**АВИАЧА́СТЬ** *ж* авиачасть, авиация часы

**АВИАШКО́ЛА** *ж* авиация мәктәбе; **курса́нт авиашко́лы** авиация мәктәбе курсанты

**АВИТАМИНО́З** *м*; *мед.* авитаминоз, витамин етешмәү; **страда́ть авитамино́зом** витамин етешмәүҙән яфаланыу

**АВО́СЬ** *частица*; *разг.* бәлки, ихтимал; **аво́сь, он придёт** бәлки, ул килер ♦ **на аво́сь** булһа булыр, булмаһа юҡ тип, уйлап тормай

**АВРА́Л** *м* аврал (**1.** *диңг. карапта бөтә команда менән эшләнгән эш* **2.** *күсм., һөйл. ҡапыл килеп сыҡҡан йәки ваҡытында үтәлмәгән эште башҡарыу өсөн бөтә көстө туплау, йәлеп итеү*)

**АВРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аврал ...ы; **авра́льная кома́нда** аврал командаһы; **авра́льные рабо́ты** аврал эштәр

**АВСТРАЛИ́ЙЦЫ** *мн.* австралийҙар, Австралия халҡы // *ед.* **австрали́ец** *м* австралий ир-аты; **австрали́йка** *ж* австралий ҡатын-ҡыҙы

**АВСТРАЛИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Австралия ...ы; **австрали́йские языки́** Австралия телдәре ♦ **австрали́йская соба́ка** австралия эте

**АВСТРИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое австрий...ы, Австрия ...ы; **австри́йский наро́д** Австрия халҡы

**АВСТРИ́ЙЦЫ** *мн.* австриялылар, австрийҙар, австрий халҡы // *ед.* **австри́ец** *м* австрий ир-аты; **австри́йка** *ж* австрий ҡатын-ҡыҙы

**АВТАРКИ́Я** *ж*; *полит.* автаркия (*империалистик дәүләттәрҙең милли хужалығын айырырға ынтылған иҡтисади сәйәсәт*)

**АВТО... I** *ҡушма һүҙҙәрҙә "үҙ", "үҙе", "үҙенеке" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөш, мәҫ.*, **автобиогра́фия** автобиография

**АВТО... II** *ҡушма һүҙҙәрҙә "автомобиль" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөш, мәҫ.*, **автозаво́д** автозавод

**АВТО... III** *ҡушма һүҙҙәрҙә "үҙе йөрөй торған" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөш, мәҫ.*, **автодрези́на** автодрезина

**АВТО... IV** *ҡушма һүҙҙәрҙә "автоматик" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөш, мәҫ.*, **автоблокиро́вка** автоблокировка

**АВТОБА́ЗА** *ж* автобаза, автомобиль базаһы; **диспе́тчер автоба́зы** автобаза диспетчеры; **центра́льная автоба́за** үҙәк автобаза

**АВТОБИОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое автобиографик; **автобиографи́ческая по́весть** автобиографик повесть; **автобиографи́ческий рома́н** автобиографик роман

**АВТОБИОГРАФИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое автобиографик, автобиография характерындағы, автобиография, (үҙ тәжрибәһе, күргәндәре) менән бәйле; **автобиографи́чное описа́ние** автобиография характерындағы һүрәтләмә

**АВТОБИОГРА́ФИЯ** *ж* автобиография; **автобиогра́фия писа́теля** яҙыусының автобиографияһы; **писа́ть автобиогра́фию** автобиография яҙыу

**АВТОБЛОКИРО́ВКА** *ж*; *ж.-д.* автоблокировка (*поездар хәрәкәтен көйләүсе автоматик сигнализация системаһы*)

**АВТОБЛОКИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое автоблокировкалы; **автоблокиро́вочное устро́йство** автоблокировкалы ҡоролма

**АВТО́БУС** *м* автобус; **маршру́тный авто́бус** маршрут автобусы; **междугоро́дний авто́бус** ҡала-ара автобус; **остано́вка авто́буса** автобус туҡталышы

**АВТО́БУСНЫЙ,** -ая, -ое автобус ...ы; **авто́бусное движе́ние** автобустар хәрәкәте; **авто́бусный парк** автобустар паркы

**АВТОВОКЗА́Л** *м* автовокзал, автобус вокзалы; **ка́сса автовокза́ла** автовокзал кассаһы; **перро́н автовокза́ла** автовокзал перроны

**АВТОГАРА́Ж** *м* автогараж; **подзе́мный автогара́ж** ер аҫты автогаражы

**АВТОГАРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое автогараж ...ы, **автогара́жный кооперати́в** автогараж кооперативы

**АВТОГЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *тех.* автоген менән; **автоге́нная ре́зка** автоген менән ҡырҡыу; **автоге́нная сва́рка** автоген менән иретеп йәбештереү

**АВТОГО́НКИ** *мн.* автоуҙыш

**АВТО́ГРАФ** *м*; *в разн. знач.* автограф; **авто́граф рома́на** романдың автографы; **дава́ть авто́граф** автограф биреү

**АВТОГРЕ́ЙДЕР** *м*; *тех.* автогрейдер (*уҙ йөрөшлө ер ҡаҙыу машинаһы*); **разровня́ть доро́гу автогре́йдером** автогрейдер менән юл тигеҙләү

**АВТОДОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое автоюлдар ...ы; **автодоро́жный те́хникум** автоюлдар техникумы; **автодоро́жное де́ло** автоюлдар төҙөү эше

**АВТОДРЕЗИ́НА** *ж*; *ж.-д.* автодрезина; **дви́гатель автодрези́ны** автодрезина двигателе

**АВТОДРО́М** *м* автодром (*автомобилдәрҙе һынау, ярыштар үткәреү өсөн йыһазландырылған урын*)

**АВТОЗАВО́Д** *м* автозавод, автомобиль заводы

**АВТОЗАВОДСКО́Й,** -ая, -ое автозавод ...ы; **автозаводска́я проду́кция** автозавод продукцияһы; **автозаводско́й цех** автозавод цехы

**АВТОИНСПЕ́КТОР** *м* автоинспектор; **госуда́рственный автоинспе́ктор** дәүләт автоинспекторы; **обще́ственный автоинспе́ктор** йәмәғәт автоинспекторы

**АВТОИНСПЕ́КЦИЯ** *ж* автоинспекция; **госуда́рственная автоинспе́кция** дәүләт автоинспекцияһы

**АВТОКА́Р** *м*; *тех.* автокар; **перевози́ть автока́ром** автокар менән ташыу

**АВТОКЛА́В** *м*; *физ.*, *хим.* автоклав (*нимәнеләр юғары баҫым аҫтында йылытыу өсөн ҡулланыла торған ныҡ итеп томаланған ҡалын стеналы һауыт*); **прогрева́ть в автокла́ве** автоклавта йылытыу

**АВТОКОЛО́ННА** *ж* автоколонна, автомобилдәр колоннаһы; **нача́льник автоколо́нны** автоколонна начальнигы (башлығы); **движе́ние автоколо́нны** автоколонна хәрәкәте

**АВТОКРА́Н** *м*; *тех.* автокран; **подня́ть автокра́ном** автокран менән күтәреү

**АВТОКРА́Т** *м*; *книжн.* автократ (*сикләнмәгән юғары хакимлыҡҡа эйә булған кеше, батша*)

**АВТОКРАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое автократик; **автократи́ческое правле́ние** автократик идара итеү

**АВТОКРА́ТИЯ** *ж*; *книжн.* автократия (*автократик идара итеү формаһы*); *см.* **самодержа́вие**, **абсолюти́зм**

**АВТОКРУЖО́К** *м* автотүңәрәк; **организова́ть автокружо́к** автотүңәрәк ойоштороу

**АВТО́Л** *м* автол; **запра́вить дви́гатель авто́лом** двигателгә автол ҡойоу

**АВТОЛА́ВКА** *ж* автолавка; **автола́вка райпо́** райпо автолавкаһы

**АВТОЛИТОГРА́ФИЯ** *ж* автолитография (*авторҙың үҙе тарафынан ташҡа эшләнгән һүрәттән алынған литография*)

**АВТОЛЮБИ́ТЕЛЬ** *м* автоһәүәҫкәр

**АВТОМАГИСТРА́ЛЬ** *ж* автомагистраль; **протяжённость автомагистра́ли** автомагистралдең оҙонлоғо

**АВТОМА́Т** *м*; *в разн. знач.* автомат; **стреля́ть из автома́та** автоматтан атыу; **рабо́тать как автома́т** автомат һымаҡ эшләү

**АВТОМАТИЗА́ЦИЯ** *ж* автоматизация, автоматлаштырыу, автоматлашыу; **автоматиза́ция произво́дства** производствоны автоматлаштырыу; **автоматиза́ция проце́сса рабо́ты** эш процесын автоматлаштырыу

**АВТОМАТИЗИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **автоматизи́ровать**; **автоматизи́рованное произво́дство** автоматлаштырылған производство

**АВТОМАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* автоматлаштырыу; **автоматизи́ровать произво́дство** производствоны автоматлаштырыу; **автоматизи́ровать проце́сс обрабо́тки мета́лла** металл эшкәртеү процесын автоматлаштырыу

**АВТОМАТИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* автоматлашыу **2.** *несов. страд. от* **автоматизи́ровать**; **произво́дство автоматизи́руется** производство автоматлаштырыла

**АВТОМАТИ́ЗМ** *м* автоматизм (*эш-хәрәкәттең автоматик рәүештә эшләнеүе*)

**АВТОМА́ТИКА** *ж* автоматика (**1.** *хеҙмәт процесын автоматлаштырыу сараларын һәм юлдарын өйрәнгән фән һәм техника тармағы* **2.** *автоматик рәүештә эшләгән механизмдар һәм ҡоралдар*); **иссле́дования в о́бласти автома́тики** автоматика өлкәһендә тикшеренеүҙәр; **примене́ние автома́тики** автоматика ҡулланыу

**АВТОМАТИ́ЧЕСКИ** *нареч.* автоматик рәүештә; **стреля́ть автомати́чески** автоматик рәүештә атыу

**АВТОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *тех.* автоматик, үҙенән-үҙе эшләй торған; **автомати́ческая винто́вка** автоматик винтовка; **автомати́ческая систе́ма управле́ния (АСУ)** автоматик идара системаһы (АИС); **автомати́ческая телефо́нная ста́нция (АТС)** автоматик телефон станцияһы (АТС); **автомати́ческий контро́ль** автоматик контроль (күҙәткес); **автомати́ческий стано́к** үҙенән-үҙе эшләй торған станок **2.** (*механический, бессознательный, непроизвольный*) уйлап тормай (ирекһеҙ) эшләгән, автоматик рәүештә, автоматик; **автомати́ческие движе́ния** автоматик рәүештә эшләнгән хәрәкәттәр

**АВТОМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **автомати́ческий** 2

**АВТОМА́ТНЫЙ,** -ая, -ое автомат ...ы, **автома́тная о́чередь** автомат тыҡылдауы

**АВТОМА́ТЧИК** *м* автоматсы (**1.** *автомат станокта һ.б. эшләгән кеше* **2.** *хәрб. автомат менән ҡоралланған һуғышсы*); **брига́да автома́тчиков** автоматсылар бригадаһы; **ро́та автома́тчиков** автоматсылар ротаһы

**АВТОМА́ТЧИЦА** *ж* автоматсы ҡатын-ҡыҙ

**АВТОМАШИ́НА** *ж* автомашина

**АВТОМЕХА́НИК** *м* автомеханик; **колхо́зный автомеха́ник** колхоз автомеханигы

**АВТОМОБИЛЕСТРОЕ́НИЕ** *с* автомобилдәр төҙөү (*сәнәғәт тармағы*)

**АВТОМОБИЛИ́ЗМ** *м* автомобилизм (*автомобилдәр менән эш итеү, автомобиль спорты*)

**АВТОМОБИЛИ́СТ** *м* автомобилсе; **высококла́ссный автомобили́ст** юғары класлы автомобилсе

**АВТОМОБИ́ЛЬ** *м* автомобиль; **грузово́й автомоби́ль** йөк автомобиле; **легково́й автомоби́ль** еңел автомобиль

**АВТОМОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое автомобиль …ы; **автомоби́льная доро́га** автомобиль юлы, машина юлы; **автомоби́льная промы́шленность** автомобиль сәнәғәте; **автомоби́льный заво́д** автомобиль заводы; **автомоби́льный парк** автомобиль паркы; **автомоби́льный тра́нспорт** автомобиль транспорты

**АВТОМОТОКЛУ́Б** *м* автомотоклуб (*автомобилистар һәм мотоциклистар клубы*); **автомотоклу́б ДОСААФ** ДОСААФ-тың автомотоклубы

**АВТОМОТОКРО́СС** *м* автомотокросс; **весе́нний автомотокро́сс** яҙғы автомотокросс; **уча́стие в автомотокро́ссе** автомотокроста ҡатнашыу

**АВТОНАСО́С** *м* **1.** автоөрҙөргөс; **накача́ть ши́ну автонасо́сом** автоөрҙөргөс менән шинды тултырыу (өрөп тултырыу) **2.** автоһурҙырғыс; **кача́ть во́ду автонасо́сом** һыуҙы автоһурҙырғыс менән сығарыу

**АВТОНАСО́СНЫЙ,** -ая, -ое автоһурҙырғыс …ы; **автонасо́сная ста́нция** автоһурҙырғыс станцияһы

**АВТОНО́МИЯ** *ж* автономия, үҙ идара (*эске закондар сығарыу һәм идара итеү эштәрен үҙ аллы хәл итеү хоҡуғы*); **культу́рно-национа́льная автоно́мия** милли-мәҙәни автономия, мәҙәни-милләт автономияһы; **территориа́льная автоно́мия** территориаль автономия; **дава́ть автоно́мию** автономия биреү; **получи́ть автоно́мию** автономия алыу

**АВТОНО́МНОСТЬ** *ж* автономлыҡ; **пра́во на автоно́мность** автономлыҡҡа хоҡуҡ

**АВТОНОМИ́СТ** *м* автономиясы

**АВТОНО́МНЫЙ,** -ая, -ое автономиялы; **автоно́мная о́бласть** автономиялы өлкә; **автоно́мное пра́во** автономия хоҡуғы; **Башки́рская Автоно́мная Сове́тская Социалисти́ческая Респу́блика (БАССР)** Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы (БАССР)

**АВТОПА́РК** *м* автопарк, автомобилдәр паркы

**АВТОПИЛО́Т** *м* автопилот (*осоусы аппарат менән автоматик рәүештә идара иткән механизм*)

**АВТОПЛУ́Г** *м* автоһабан (*эске яныу газ двигателе менән эшләгән үҙ йөрөшлө һабан*); **пятиле́мешный автоплу́г** биш төрәнле автоһабан

**АВТОПОГРУ́ЗЧИК** *м* автотейәгес

**АВТОПО́ЕЗД** *м* автопоезд; **многоприце́пный автопо́езд** күп тағылмалы автопоезд

**АВТОПОИ́ЛКА** *ж*; *спец.* (*устройство*) автоэсергес; **устана́вливать на фе́рме автопои́лку** фермала автоэсергес ҡуйыу

**АВТОПОИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое автоэсергесле; **автопои́льный агрега́т** автоэсергесле агрегат

**АВТОПОРТРЕ́Т** *м* автоһүрәт (*рәссамдың, скульпторҙың үҙен-үҙе төшөргән һүрәте*); **писа́ть автопортре́т** автоһүрәт төшөрөү

**А́ВТОР** *м* автор; **а́втор кни́ги** китап авторы; **а́втор пе́сни** йыр авторы; **а́втор прое́кта** проект авторы

**АВТОРЕМО́НТ** *м* авторемонт; **производи́ть авторемо́нт** авторемонт яһау

**АВТОРЕМО́НТНЫЙ,** -ая, -ое авторемонт …ы; **авторемо́нтная мастерска́я** авторемонт оҫтаханаһы; **авторемо́нтные рабо́ты** авторемонт эштәре; **авторемо́нтный заво́д** авторемонт заводы

**АВТОРЕФЕРА́Т** *м* автореферат; **автореферат диссерта́ции** диссертацияның авторефераты

**АВТОРИЗА́ЦИЯ** *ж* авторлаштырыу; **авториза́ция те́кста** тексты авторлаштырыу

**АВТОРИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **авторизова́ть 2.** *прил.* авторлаштырылған; **авторизо́ванная ко́пия карти́ны** картинаның авторлаштырылған күсермәһе; **авторизо́ванный перево́д** авторлаштырылған тәржемә

**АВТОРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* авторлаштырыу

**АВТОРИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* авторитар (**1.** *власҡа, авторитетҡа өнһөҙ буйһоноуға нигеҙләнгән* **2.** *үҙенең абруйын нығытырға ынтылған*); **авторита́рный строй** авторитар ҡоролош

**АВТОРИТЕ́Т** *м* **1.** авторитет, абруй, дәрәжә; **завоева́ть авторите́т** авторитет яулау (яҙаныу); **подня́ть авторите́т** абруй күтәреү; **подорва́ть авторите́т** абруйҙы төшөрөү (ҡаҡшатыу); **по́льзоваться авторите́том** абруйлы булыу; **теря́ть авторите́т** абруй юғалтыу **2.** авторитет, танылған, дәрәжәле кеше; **авторите́т в нау́ке** фәндә танылған кеше; **быть авторите́том** *для кого-л. кем өсөндөр* авторитет булыу

**АВТОРИТЕ́ТНОСТЬ** *ж* авторитетлыҡ, абруйлылыҡ, дәрәжәлелек; **авторите́тность заявле́ния** белдереүҙең авторитетлығы; **авторите́тность роди́телей** ата-әсәнең абруйлылығы; **авторите́тность ста́рших** өлкәндәрҙең абруйлылығы

**АВТОРИТЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** авторитетлы, абруйлы, дәрәжәле; **авторите́тный руководи́тель** авторитетлы етәксе; **авторите́тный челове́к** абруйлы кеше **2.** ышаныслы, танылған; **авторите́тный журна́л** танылған журнал; **авторите́тное мне́ние** ышаныслы фекер **3.** авторитетлы, талапсан; **авторите́тный тон** талапсан тон

**А́ВТОРСКИЙ,** -ая, -ое автор ...ы; **а́вторский за́мысел** авторҙың төп фекере; **а́вторский коллекти́в** авторҙар коллективы; **а́вторский лист** автор табағы ♦ **а́вторское пра́во** авторлыҡ хоҡуғы; **а́вторское свиде́тельство** авторлыҡ таныҡлығы

**А́ВТОРСТВО** *с* авторлыҡ; **отста́ивать пра́во на а́вторство** авторлыҡ хоҡуғын даулау; **претенде́нт на а́вторство** авторлыҡҡа дәғүә итеүсе

**АВТОРУ́ЧКА** *ж* авторучка; **черни́ла для автору́чки** авторучка ҡараһы; **ша́риковая автору́чка** шариклы авторучка

**АВТОСАМОСВА́Л** *м* ауҙармалы машина; **заво́д автосамосва́лов** ауҙармалы машиналар заводы

**АВТОСВА́РКА** *ж* автосварка

**АВТОСВА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое автосварка ...ы; **автосва́рочный аппара́т** автосварка аппараты

**АВТОСТО́П** *м*; *ж.-д.* автотуҡтатҡыс; **нажа́ть на автосто́п** автотуҡтатҡысҡа баҫыу

**АВТОСТРА́ДА** *ж* автострада (*автомобилдәр хәрәкәтен еңеләйтеү һәм тиҙләтеү өсөн эшләнгән махсус юл*); **автостра́да Москва́—Берли́н** Мәскәү—Берлин автострадаһы

**АВТОСЦЕ́ПКА** *ж* автоэләктергес; **автосце́пка ваго́нов** вагон автоэләктергесе

**АВТОТИ́ПИЯ** *ж*; *полигр.* автотипия (*фотомеханик юл менән ярым тонлы һүрәттәрҙе баҫыу ысулы һәм шул юл менән баҫылған һүрәт*)

**АВТОТО́РМОЗ** *м*; *ж.-д.* автотормоз (*поезд туҡтатыу өсөн автоматик рәүештә эшкә ҡушылған тормоз*)

**АВТОТОРМОЗНО́Й,** -ая, -ое автотормоз ...ы; **автотормозна́я систе́ма** автотормоз системаһы

**АВТОТРА́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое автотрактор ...ы; **автотра́кторный парк** автотрактор паркы; **автотра́кторная промы́шленность** автотрактор сәнәғәте

**АВТОТРА́НСПОРТ** *м* автотранспорт; **по́льзоваться автотра́нспортом** автотранспортты файҙаланыу

**АВТОТРА́НСПОРТНЫЙ,** -ая, -ое автотранспорт ...ы; **автотра́нспортная ба́за** автотранспорт базаһы; **автотра́нспортное управле́ние** автотранспорт идаралығы; **автотра́нспортное хозя́йство** автотранспорт хужалығы

**АВТОТРА́ССА** *ж* автотрасса; **е́хать по автотра́ссе** автотрассанан барыу

**АВТОТУРИ́ЗМ** *м* автотуризм; **занима́ться автотури́змом** автотуризм менән шөғөлләнеү

**АВТОХОЗЯ́ЙСТВО** *с* автохужалыҡ; **городско́е автохозя́йство** ҡала автохужалығы

**АВТОХТО́НЫ** *мн.* автохтондар, ерле халыҡ

**АВТОШИ́НА** *ж* автошин; **автоши́на для грузово́й маши́ны** йөк машинаһы автошины; **купи́ть автоши́ну** автошин һатып алыу

**АВТОШИ́ННЫЙ,** -ая, -ое автошин ...ы; **автоши́нный заво́д** автошиндар заводы

**АГА́ I** *межд.* әһә; **ага́, попа́лся!** әһә, эләктеңме!

**АГА́ II** *частица*; *прост.* эйе; **ты по́мнишь его́? — Ага́!** һин уны хәтерләйһеңме? — Эйе!

**АГА́ВА** *ж* агава; **цвето́к ага́вы** агава сәскәһе; **сок ага́вы** агава һуты

**АГА́Т** *м* аҡыҡ

**АГА́ТОВЫЙ,** -ая, -ое аҡыҡ; **ага́товая ва́за** аҡыҡ ваза ♦ **ага́товые глаза́** сөм-ҡара ялтыр күҙ

**АГГЛЮТИНАТИ́ВНОСТЬ** *ж*; *лингв.* агглютинативлыҡ; **показа́тель агглютинати́вности** агглютинативлыҡ күрһәткесе

**АГГЛЮТИНАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* агглютинатив; **агглютинати́вные языки́** агглютинатив телдәр

**АГГЛЮТИНА́ЦИЯ** *ж* агглютинация (**1.** *лингв. тамыры үҙгәрмәйенсә, ялғауҙар, аффикстар ялғанып, яңы һүҙ, формалар яһалыу юлы* **2.** *биол. бактерияларҙың бергә уҡмашып йәбешеүе*); **биологи́ческая агглютина́ция** биологик агглютинация; **лингвисти́ческая агглютина́ция** лингвистик агглютинация; **явле́ние агглютина́ции** агглютинация күренеше

**АГЕ́НТ I** *м* **1.** агент; **аге́нт по снабже́нию** тәьминәт агенты **2.** (*шпион*) агент, шымсы; **аге́нт контрразве́дки** контрразведка агенты

**АГЕ́НТ II** *м*; *книжн.* агент, сәбәпсе (*тәбиғәттә теге йәки был күренештәрҙе тыуҙырған сәбәп*); **атмосфе́рные аге́нты** атмосфера агенттары

**АГЕ́НТСКИЙ,** -ая, -ое агент ...ы

**АГЕ́НТСТВО** *с* агентлыҡ; **аге́нтство Аэрофло́та** Аэрофлот агентлығы; **телегра́фное аге́нтство** телеграф агентлығы

**АГЕНТУ́РА** *ж* агентура; **вра́жеская агенту́ра** дошман агентураһы; **све́дения агенту́ры** агентура мәғлүмәттәре

**АГЕНТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое агентура ...ы; **агенту́рные све́дения** агентура мәғлүмәттәре; **агенту́рная разве́дка** агентура разведкаһы

**АГИТ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "агитация", "агитацион" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **агитпу́нкт** агитпункт

**АГИТА́ТОР** *м* агитатор; **рабо́та агита́тора** агитатор эше; **семина́р агита́торов** агитаторҙар семинары

**АГИТА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое агитатор(ҙар) ...ы, агитаторлыҡ ...ы; **агита́торские обя́занности** агитаторлыҡ бурыстары

**АГИТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое агитацион, агитация ...ы; **агитацио́нная рабо́та** агитацион эш; **агитацио́нный материа́л** агитация материалы

**АГИТА́ЦИЯ** *ж* агитация; **нагля́дная агита́ция** күргәҙмә агитация; **та́йная агита́ция** йәшерен агитация

**АГИТБРИГА́ДА** *ж* агитбригада, агитация бригадаһы; **выступле́ние агитбрига́ды** агитбригада сығышы; **коллекти́в агитбрига́ды** агитбригада коллективы

**АГИТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **агити́ровать**

**АГИТИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *за кого-что* и *без доп.*, өндәү, өгөтләү; **агити́ровать наро́д** халыҡты өндәү **2.** өгөтләү, димләү; **агити́ровать их нет смы́сла** уларҙы өгөтләүҙән файҙа юҡ

**АГИ́ТКА** *ж*; *разг.* агитка (*агитация маҡсатын күҙҙә тотоп яҙылған әҙәби әҫәр*); **вы́пустить аги́тку** агитка сығарыу

**АГИТКАМПА́НИЯ** *ж* агитация кампанияһы; **вести́ агиткампа́нию** агитация кампанияһы алып барыу, агиткампания алып барыу

**АГИТКОЛЛЕКТИ́В** *м* агитколлектив, агитаторҙар коллективы; **агитколлекти́в избира́тельного уча́стка** һайлау участкаһының агитаторҙар коллективы

**АГИТМА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое агитмасса; **агитма́ссовая рабо́та** агитмасса эше

**АГИТПЛАКА́Т** *м* агитплакат, агитация плакаты; **печа́тать агитплака́ты** агитплакаттар баҫыу

**АГИТПО́ЕЗД** *м* агитпоезд, агитация поезы

**АГИТПУ́НКТ** *м* агитпункт, агитация пункты; **проводи́ть бесе́ду в агитпу́нкте** агитпунктта әңгәмә үткәреү

**АГЛОМЕРА́Т** *м* агломерат (**1.** *геол. барлыҡҡа килгән төрлө минералдарҙың көпшәк тупланмаһы* **2.** *тех. иретеп уҡмаштырылған киҫәк-киҫәк мәғдән*)

**АГЛОМЕРА́ЦИЯ** *ж*; *тех.* агломерация (*йомшаҡ ваҡ мәғдәнде, туҙан һымаҡ материалды ҡыҙҙырып, ҙур-ҙур киҫәктәргә уҡмаштырыу*)

**АГЛОМЕРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое агломерацион, агломерация ...ы; **агломерацио́нная маши́на** агломерация машинаһы

**А́ГНЕЦ** *м*; *книжн.*, *уст.* **1.** бәрәс **2.** *перен.* йыуаш, баҫымсаҡ кеше

**АГНО́СТИК** *м*; *филос.* агностик (*агностицизм яҡлы кеше*)

**АГНОСТИЦИ́ЗМ** *м*; *филос.* агностицизм (*ысынбарлыҡты һәм уның законлыҡтарын өйрәнеү мөмкинлеген кире ҡаҡҡан идеалистик фәлсәфә тәғлимәте*)

**АГНОСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое агностик; **агности́ческое уче́ние** агностик тәғлимәт

**АГОНИЗИ́РОВАТЬ** *несов.* агонияға талыу, үлем ғазабында булыу

**АГО́НИЯ** *ж* агония, үлем алды ғазабы

**АГРА́РИЙ** *м*; *книжн.* аграрий (*эре ер биләүсе*)

**АГРА́РНИК** *м*; *разг.* аграрсы (*аграр мәсьәлә буйынса белгес*)

**АГРА́РНЫЙ,** -ая, -ое аграр; **агра́рная поли́тика** аграр сәйәсәт; **агра́рная рефо́рма** аграр реформа; **агра́рный вопро́с** аграр мәсьәлә

**АГРЕГА́Т** *м* агрегат (**1.** *тех. бер дөйөм эште башҡарыу өсөн бергә беркетелгән төрлө типтағы бер нисә машина, ҡоролма* **2.** *тех. ҡатмарлы машиналарҙа билдәле бер операцияны башҡарыу өсөн ҡулайлаштырылған деталдәр* **3.** *мин. тау тоҡомон барлыҡҡа килтергән минералдар йыйылмаһы*); **электродои́льный агрега́т** электр менән һауыу агрегаты

**АГРЕГА́ТНЫЙ,** -ая, -ое агрега́т, агрегат ...ы ♦ **агрега́тное состоя́ние вещества́** матдәнең агрегат хәле

**АГРЕССИ́ВНОСТЬ** *ж* агрессивлыҡ, баҫҡынсылыҡ, дошмансылыҡ; **агресси́вность госуда́рственной поли́тики** дәүләт сәйәсәтенең дошмансылығы

**АГРЕССИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое агрессив, баҫҡынсыл; **агресси́вная поли́тика** баҫҡынсылыҡ сәйәсәте; **агресси́вные си́лы** агрессив көстәр

**АГРЕ́ССИЯ** *ж* агрессия, баҫып алыу, баҫымта; **иностра́нная агре́ссия** сит илдәрҙең баҫып алыуы; **результа́т агре́ссии** баҫымта һөҙөмтәһе

**АГРЕ́ССОР** *м* агрессор, баҫҡынсы; **обузда́ть агре́ссора** баҫҡынсыны ауыҙлыҡлау

**АГРО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "агрономик", "агрономия" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **агроте́хника** агротехника

**АГРОБИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое агробиологик; **агробиологи́ческая нау́ка** агробиологик фән; **агробиологи́ческие усло́вия** агробиологик шарттар

**АГРОБИОЛО́ГИЯ** *ж* агробиология (*игенселек, малсылыҡ һәм үҫемлектәр үҫтереү эшендәге дөйөм биологик ҡанундар тураһындағы фән*)

**АГРОКУЛЬТУ́РА** *ж* агрокультура (*баҫыусылыҡ, игенселек культураһын яҡшыртыуға йүнәлтелгән саралар йыйылмаһы*)

**АГРОКУЛЬТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое агрокультура ...ы; **агрокульту́рные мероприя́тия** агрокультура саралары

**АГРОЛЕСОМЕЛИОРА́ЦИЯ** *ж* агроурманмелиорация (*юғары уңыш алыу өсөн климат һәм тупраҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса эшләнгән саралар системаһы*)

**АГРОМЕРОПРИЯ́ТИЕ** *с* агросара; **систе́ма агромероприя́тий** агросаралар системаһы

**АГРОМЕТЕОРОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое агрометеорологик; **агрометеорологи́ческие наблюде́ния** агрометеорологик күҙәтеүҙәр; **агрометеорологи́ческий пункт** агрометеорология пункты

**АГРОМЕТЕОРОЛО́ГИЯ** *ж* агрометеорология (*ауыл хужалығы өсөн әһәмиәтле метеоро-*

*логик, гидрологик шарттарҙы һәм климатты өйрәнгән ярҙамсы метеорология фәне)*

**АГРОНО́М** *м* агроном, агрономия белгесе; **гла́вный агроно́м** баш агроном

**АГРОНОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** агрономик; **агрономи́ческие мероприя́тия** агрономик саралар **2.** агрономия ...ы; **агрономи́ческая лаборато́рия** агрономия лабораторияһы; **агрономи́ческий факульте́т** агрономия факультеты **3.** агрономлыҡ; **агрономи́ческая специа́льность** агрономлыҡ белгеслеге; **агрономи́ческое образова́ние** агрономлыҡ белеме

**АГРОНО́МИЯ** *ж* агрономия (*ауыл хужалығы культураларын эшкәртеү тураһындағы фәндәр комплексы)*

**АГРОТЕ́ХНИК** *м* агротехник, агротехника белгесе

**АГРОТЕ́ХНИКА** *ж* агротехника (*ауыл хужалығы культураларын үҫтереү, ҡарау юлдары системаһы*); **после́дние достиже́ния агроте́хники** агротехниканың һуңғы ҡаҙаныштары

**АГРОТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** агротехник; **агротехни́ческая учёба** агротехник уҡыуҙар; **агротехни́ческие мероприя́тия** агротехник саралар **2.** агротехника ...ы; **агротехни́ческий факульте́т** агротехника факультеты

**АГРОХИ́МИК** *м* агрохимик, агрохимия белгесе

**АГРОХИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** агрохимик; **агрохими́ческие мероприя́тия** агрохимик саралар **2.** агрохимия ...ы; **агрохими́ческие рабо́ты** агрохимия эштәре

**АГРОХИ́МИЯ** *ж* агрохимия (*юғары тоторо̄ҡло уңыш алыу маҡсатында үҫемлектәрҙе аҙыҡландырыу, ашламалар һәм үҫемлектәрҙе химик юл менән һаҡлауҙы ҡулланыу тураһындағы фән)*

**АГУ́ЛЫ** *мн.* агулдар, агул халҡы (*Дағстанда йәшәгән халыҡ) // ед.* **агу́л** и **агу́лец** *м* агул ир-аты; **агу́лка** *ж* агул ҡатын-ҡыҙы

**АГУ́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое агул ...ы; **агу́льский язы́к** агул теле

**АД** *м* **1.** *рел.* тамуҡ, йәһәннәм; **попа́сть в ад** тамуҡҡа инеү; **горе́ть в аду́** тамуҡта яныу **2.** *перен.* ауырлыҡ, михнәт, ғазап; **ад войны́** һуғыш михнәте ♦ **исча́дие а́да** тамуҡ киҫәүе; **кроме́шный ад** ҡот осҡос хәл, сыҙамаҫлыҡ хәл

**АДА́ЖИО** *муз.* **1.** *нареч.* адажио, һалмаҡ, яй (*музыка әҫәрҙәренең башҡарылыу темпына ҡарата)* **2.** *с нескл.* адажио (*яй темпта башҡарылған музыка әҫәре йәки уның бер өлөшө)*

**АДА́МОВ: ада́мово я́блоко** *анат.* күмәгәй

**АДАМСИ́Т** *м* адамсит (*тын юлына тәьҫир итә торған ағыулы матдә)*

**АДАМСИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое адамсит ...ы; **адамси́товый за́пах** адамсит еҫе

**АДАПТА́ЦИЯ** *ж* **1.** адаптация, яраҡлашыу (*тереклектең, тойоу ағзаларының йәшәгән шарттарға яраҡлашыуы, яйлашыуы*); **адапта́ция органи́зма** организмдың адаптацияһы (яраҡлашыуы) **2.** ябайлаштырыу, еңеләштереү (*сит телде өйрәнә башлаусылар өсөн тексты еңеләштереү*); **адапта́ция те́кста** тексты еңеләштереү

**АДА́ПТЕР** *м* адаптер (*яҙылған тауышты көсәйткес аша яңынан ишеттерә торған прибор)*

**АДАПТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **адапта́ция** 2, **адапти́ровать**

**АДАПТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* ябайлаштырыу, еңеләштереү; **адапти́ровать текст** тексты ябайлаштырыу

**АДАПТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* яраҡлашыу; **органи́зм адапти́ровался** организм яраҡлашҡан

**АДВЕРБИАЛИЗА́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* адвербиализация, рәүешләшеү, рәүешкә күсеү; **адвербиализа́ция прилага́тельных** сифаттарҙың рәүешләшеүе

**АДВОКА́Т** *м* адвокат; **колле́гия адвока́тов** адвокаттар коллегияһы

**АДВОКА́ТСКИЙ,** -ая, -ое адвокат ...ы; **адвока́тская де́ятельность** адвокат эшмәкәрлеге

**АДВОКАТУ́РА** *ж собир.* адвокаттар

**АДЕКВА́ТНОСТЬ** *ж* адекватлыҡ, берҙәйлек; **адеква́тность поня́тий** төшөнсәләрҙең адекватлығы, берҙәйлеге, тап килеүе

**АДЕКВА́ТНЫЙ,** -ая, -ое адекват, тап килгән, берҙәй, тиңдәш; **адеква́тные поня́тия** адекват (бер төрлө) төшөнсәләр; **адеква́тное явле́ние** адекват күренеш, тап килгән күренеш

**АДЕНО́ИДЫ** *мн.* (*ед.* **адено́ид** *м*); *мед.* аденоид (*тамаҡ биҙенең шешеп ҙурайыуы)*

**АДЖА́РСКИЙ,** -ая, -ое аджар ...ы, Аджария ...ы; **аджа́рский наро́д** аджар халҡы; **аджа́рский язы́к** аджар теле

**АДЖА́РЦЫ** *мн.* аджарҙар, аджар халҡы (*Аджарстандың төп халҡы) // ед.* **аджа́рец** *м* аджар ир-аты; **аджа́рка** *ж* аджар ҡатын-ҡыҙы

**АДМИНИСТРАТИ́ВНО-ТЕРРИТОРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое административ-территориаль; **администрати́вно-территориа́льное деле́ние Респу́блики Башкортоста́н** Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль бүленеше

**АДМИНИСТРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** административ; **администрати́вная до́лжность** административ вазифа; **администрати́вные ме́ры** административ саралар; **в администрати́вном поря́дке** административ тәртиптә **2.** администрация ...ы; **администрати́вный отде́л** администрация бүлеге

**АДМИНИСТРА́ТОР** *м* администратор (**1.** *нимә менәндер идара итеүсе вазифалы кеше* **2.** *яуаплы башҡарыусы, етәксе)*

**АДМИНИСТРА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое администратор, администраторлыҡ ...ы; **админист-**

**ра́торские спосо́бности** администраторлыҡ һәләте

**АДМИНИСТРА́ЦИЯ** *ж* **1.** администрация (**1.** *ойошманың, предприятиеның етәксе органы* **2.** *ойошмала, предприятиела идара итеү эшен алып барыусы вазифалы кешеләр*); **администра́ция заво́да**; **заводска́я администра́ция** завод администрацияһы **2.** хакимиәт; **администра́ция го́рода** ҡала хакимиәте

**АДМИНИСТРИ́РОВАНИЕ** *с см.* **администри́ровать**

**АДМИНИСТРИ́РОВАТЬ** *несов.* етәкселек итеү (*бойороҡтар биреп кенә, бюрократтарса етәкселек итеү*)

**АДМИРА́Л** *м* адмирал; **адмира́л фло́та** флот адмиралы; **зва́ние адмира́ла** адмирал дәрәжәһе

**АДМИРАЛТЕ́ЙСТВО** *с* адмиралтейство (**1.** *иҫк. хәрби караптар төҙөү, ремонтлау һәм кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү урыны* **2.** *Рәсәйҙә һәм Англияла флот менән идара итеү органы* **3.** *Санкт-Петербургта элекке хәрби флоттың баш идара йорто*); **зда́ние Адмиралте́йства** Адмиралтейство йорто

**АДМИРА́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое адмирал ...ы; **адмира́льское зва́ние** адмирал званиеһы; **адмира́льский кора́бль** адмирал карабы

**АДМИРА́ЛЬША** *ж*; *разг.* адмирал ҡатыны

**АДО́НИС** *м* атрасман, һары умырзая, адонис (*дарыу үләне*)

**А́ДРЕС** *м* **1.** адрес; **дома́шний а́дрес** йорт адресы; **дать а́дрес** адрес биреү; **смени́ть а́дрес** адрес үҙгәртеү; **доста́вить письмо́ по а́дресу** хатты адрес буйынса тапшырыу; **писа́ть а́дрес** адрес яҙыу **2.** ҡотлау яҙыуы; **вручи́ть а́дрес** ҡотлау яҙыуы биреү **3.** *тех.* адрес, код ♦ **не по а́дресу** тейешле урынға түгел, кәрәк кешегә түгел; **по а́дресу** *чьему кемгәлер* ҡарата; **в а́дрес** *кого-чего кемдеңдер* исеменә

**АДРЕСА́НТ** *м* адресант (*хатты, посылканы һ.б. кемгәлер тәғәйенләп ебәргән кеше*)

**АДРЕСА́Т** *м* адресат (*хатты һ.б. алған кеше йәки учреждение*); **адреса́т письма́** хатты алған кеше

**А́ДРЕСНЫЙ,** -ая, -ое адрестар ...ы; **а́дресное бюро́** адрестар бюроһы; **а́дресная кни́га** адрестар кенәгәһе; **а́дресный стол** адрестар өҫтәле

**АДРЕСОВА́ТЬ** *сов., несов. что, кому-чему* **1.** адреслау; **адресова́ть письмо́** хатты адреслау **2.** *перен.* ебәреү, йүнәлтеү; **адресова́ть вопро́с прези́диуму** һорауҙы президиумға ебәреү

**АДРЕСОВА́ТЬСЯ** **1.** *сов., несов. куда, к кому-чему* мөрәжәғәт итеү **2.** *несов. страд. от* **адресова́ть**

**А́ДСКИЙ,** -ая, -ое **1.** тамуҡ, йәһәннәм ...ы; **а́дская бе́здна** йәһәннәм (төпкөлө) соҡоро, тамуҡ **2.** (*ужасный*) ҡот осҡос, ифрат ҡыйын; **а́дская доро́га** ҡот осҡос юл **3.** (*злобный, коварный*) уҫал, яуыз; **а́дский за́мысел** яуыз ниәт **4.** (*чрезмерный*) үтә ныҡ, сыҙай алмаҫлыҡ; **а́дский хо́лод** үтә ныҡ, сыҙай алмаҫлыҡ һыуыҡ ♦ **а́дский ка́мень** *уст.* тамуҡ ташы (*азот әсемәле көмөш, көмөш нитраты*)

**АДСОРБИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* и *без доп.*; *физ., хим.* адсорбциялау

**АДСОРБИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **адсорби́ровать**

**АДСОРБЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое адсорбция ...ы; **адсорбцио́нный проце́сс** адсорбция процесы

**АДСО́РБЦИЯ** *ж*; *физ., хим.* адсорбция (*шыйыҡлыҡ йәки ҡаты есемдең өҫкө ҡатлауы тарафынан иретмә йәки газ матдәнең үҙләштерелеүе*)

**АДЪЮ́НКТ** *м* адъюнкт (**1.** *юғары хәрби уҡыу йорттарының аспиранты* **2.** *батша Рәсәйендә һәм Көнбайыш Европала ҡайһы бер ғилми учреждениеларҙағы кесе ғилми вазифа һәм шул вазифаны башҡарыусы*)

**АДЪЮНКТУ́РА** *ж* адъюнктура (*юғары хәрби уҡыу йорттарының аспирантураһы*)

**АДЪЮТА́НТ** *м* адъютант (*хеҙмәт буйынса йомоштарҙы йәки штаб эштәрен үтәү өсөн хәрби начальник эргәһенә ҡуйылған офицер*); **адъюта́нт команди́ра диви́зии** дивизия командирының адъютанты

**АДЪЮТА́НТСКИЙ,** -ая, -ое адъютант, адъютантлыҡ ...ы; **адъюта́нтские обя́занности** адъютантлыҡ бурыстары

**АДЫГЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое адыгей ...ы, Адыгея ...ы; **адыге́йский наро́д** адыгей халҡы; **адыге́йский язы́к** адыгей теле

**АДЫГЕ́ЙЦЫ** *мн.* адыгейҙар, адыгей халҡы // *ед.* **адыге́ец** *м* адыгей ир-аты; **адыге́йка** *ж* адыгей ҡатын-ҡыҙы

**АЖ** *частица* и *союз*; *прост.* **1.** *усил. частица* (*даже*) хатта; **аж и гла́зом не моргну́л** хатта күҙен дә йомманы **2.** *союз* (*так что, что даже*; *употребляется при придаточных предложениях следствия*) хатта; **на у́лице тепло́, аж та́ет под нога́ми** урамда йылы, хатта аяҡ аҫты ирей ята

**АЖИОТА́Ж** *м* **1.** ажиотаж (*табыш алыу маҡсатында биржа ҡағыҙы йәки тауар хаҡы курсының яһалма спекуляция юлы менән күтәрелеүе йәки төшөүе*) **2.** *перен.* ығы-зығы, шау-шыу; **вы́звать ажиота́ж** ығы-зығы ҡуптарыу

**АЖУ́Р I** *нареч.*; *бухг.* көндөкөн-көнгә, шул уҡ көндө ♦ **в ажу́ре** бик шәп, тейешле кимәлдә (*эшкә ҡарата*)

**АЖУ́Р II** *м*; *уст.* ажур, селтәр; **вышива́ть ажу́ром** ажур менән сигеү

**АЖУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*прозрачный*) үтә күренмәле, селтәрләп эшләнгән; **ажу́рные перча́тки** селтәрләп бәйләнгән бирсәткә **2.** *перен.* (*искусно и тонко сделанный*) оҫта эшләнгән; **ажу́рная рабо́та** оҫта эшләнгән эш

**АЗ** *м* **1.** аз (*урыҫ алфавитындағы "а" хәрефенең боронғо атамаһы*) **2.** *мн.* **азы́**; *перен.*

ниҙеҙдер башы, башланғыс мәғлүмәттәр; **нача́ть с азо́в** баштан башлау, яңынан башлау ♦ **ни аза́ (в глаза́) не знать**; **ни аза́ не знать (не понима́ть, не смы́слить)** элепте таяҡ тип белмәү

**АЗА́ЛИЯ** *ж* азалия (*төрлө төҫтәге эре сәскә атҡан көньяҡ ҡыуағы*)

**АЗА́РТ** *м* ҡомар, ҡомарлыҡ, ныҡ бирелеү, мауығыу, ҡыҙып китеү; **войти́ в аза́рт** ҡомар асылыу, ныҡ бирелеү; **игра́ть с аза́ртом** ҡыҙып китеп, ныҡ бирелеп уйнау; **спорти́вный аза́рт** спорт ҡомары

**АЗА́РТНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ҡомарланыу, ныҡ мауығыу, ҡыҙып китеү; **аза́ртничать в игре́** уйында ҡомарланыу, ныҡ мауығып уйнау

**АЗА́РТНОСТЬ** *ж* ҡомарлыҡ; **аза́ртность игры́** уйындың ҡомарлығы

**АЗА́РТНЫЙ**, -ая, -ое ҡомар, мауығыусан; **аза́ртный челове́к** ҡомар кеше ♦ **аза́ртная игра́** ҡомарлы уйын

**А́ЗБУКА** *ж* **1.** *см.* **алфави́т** **2.** (*букварь*) әлифба; **взять в ру́ки а́збуку** әлифбаны ҡулға алыу; **чита́ть а́збуку** әлифба уҡыу **3.** *перен.* нигеҙ, башланғыс, әлифба; **а́збука нау́ки** фән нигеҙҙәре ♦ **а́збука Мо́рзе** Морзе азбукаһы

**А́ЗБУЧНЫЙ**, -ая, -ое **1.** әлифба …ы; **а́збучный материа́л** әлифба материалы **2.** алфавит …ы; **а́збучный поря́док** алфавит тәртибе ♦ **а́збучная и́стина** һәр кемгә билдәле, нигеҙ (төп) хәҡиҡәт

**АЗЕРБАЙДЖА́НСКИЙ**, -ая, -ое әзербайжан …ы, Әзербайжан …ы; **азербайджа́нский наро́д** әзербайжан халҡы; **азербайджа́нский язы́к** әзербайжан теле

**АЗЕРБАЙДЖА́НЦЫ** *мн.* әзербайжандар, әзербайжан халҡы // *ед.* **азербайджа́нец** *м* әзербайжан ир-аты; **азербайджа́нка** *ж* әзербайжан ҡатын-ҡыҙы

**АЗИА́ТСКИЙ**, -ая, -ое Азия …ы; **азиа́тские стра́ны** Азия илдәре

**АЗИА́ТЧИНА** *ж*; *уст.* ҡырағайлыҡ, томаналыҡ

**АЗИА́ТЫ** *мн* **1.** Азия кешеләре, Азиянан сыҡҡан кешеләр // *ед.* **азиа́т** Азия ир-аты; **азиа́тка** Азия ҡатын-ҡыҙы **2.** *уст.*, *бран.* азиат, наҙан, томана, ҡырағай (*кеше*)

**А́ЗИМУТ** *м* азимут (**1.** *астр.*, *геол.* күҙәтеүсе торған яҫылыҡ менән билдәле нөктә һәм ниндәйҙер күк йөҙөндәге яҡтыртҡыс аша үткән вертикаль яҫылыҡ араһындағы мөйөш **2.** *хәрб.* бирелгән хәрәкәт йүнәлеше менән төньяҡ йүнәлеш араһында барлыҡҡа килгән мөйөш **3.** *ер өҫтөнән туранан-тураға хәрәкәт итеү өсөн карта һәм компас менән билдәләнгән йүнәлеш*); **определе́ние а́зимута** азимутты билдәләү; **идти́ по а́зимуту** азимут буйынса (барыу), хәрәкәт итеү

**АЗИМУТА́ЛЬНЫЙ**, -ая, -ое *спец.* азимуталь; **азимута́льное кольцо́** азимуталь дүңгәләк; **азимута́льный круг ко́мпаса** компастың азимуталь дүңгәләге

**А́ЗИМУТНЫЙ**, -ая, -ое азимут …ы; **а́зимутное отклоне́ние** азимут тайпылышы

**АЗО́Т** *м* азот (*химик элемент, газ*); **свобо́дный азо́т** ирекле азот; **ввести́ в по́чву азо́т** тупраҡҡа азот индереү

**АЗОТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **азоти́ровать**; **азоти́рование ста́ли** ҡоросто азотлау

**АЗОТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* азотлау; **азоти́ровать по́чву** тупраҡты азотлау; **азоти́ровать сталь** ҡоросто азотлау

**АЗОТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **азоти́ровать**

**АЗО́ТИСТЫЙ**, -ая, -ое азотлы; **азо́тистая кислота́** азотлы кислота; **азо́тистое желе́зо** азотлы тимер; **азо́тистые удобре́ния** азотлы ашламалар

**АЗО́ТНЫЙ**, -ая, -ое азот …ы; **азо́тная кислота́** азот кислотаһы

**АЗОТОБА́КТЕР** *м* азотобактер (*һауалағы азотты үҙләштерә алған тупраҡ бактерияһы*)

**АИ́Р** *м* ҡылыс үлән, ер тамыры

**А́ИСТ** *м* ҡауҙы; **гнездо́ а́иста** ҡауҙы ояһы

**АИСТЁНОК** *м* ҡауҙы балаһы

**А́ИСТНИК** *м* ҡауҙы үләне

**АЙ I** *межд.* **1.** (*выражает боль, испуг*) уй, абау; **ай, ай, бо́льно!** уй, уй, ауырта!; **ай, ай, что же э́то тако́е!** абау, нимә һуң был! **2.** (*выражает упрёк, порицание, сожаление и т.п.*) әй, әй-әй; **ай, как нехорошо́** әй-әй, яҡшы түгел дә **3.** (*выражает удивление, восхищение, одобрение*) их, һай; **ай ребя́та, ай молодцы́!** һай егеттәр, һай шәптәр! ♦ **ай да** бына, бына нисек; **ай да весе́лье** бына нисек күңел асыу

**АЙ II** *союз*; *разг.* әллә; **ай заду́мал что́-то недо́брое?** әллә берәй хөсөт уйланыңмы?

**АЙВА́** *ж* айва; **цвето́к айвы́** айва сәскәһе

**АЙВО́ВЫЙ**, -ая, -ое айва …ы; **айво́вое варе́нье** айва ҡайнатмаһы; **айво́вое де́рево** айва ағасы

**АЙДА́** *межд.*; *прост.* әйҙә, киттек, ҡуҙғалдыҡ; **айда́ за гриба́ми** киттек бәшмәккә; **айда́ во двор** әйҙә тышҡа сығайыҡ

**А́ЙКАТЬ** *несов.*; *разг.* айбайлау; **кто́-то гро́мко а́йкает** кемдер көслө айбайлай

**АЙМА́К** *м* аймаҡ (**1.** *Бүрәт Республикаһында, Алтай Республикаһында — административ район* **2.** *Монгол Халыҡ Республикаһында эре административ-территориаль берәмек* **3.** *тар. төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда боронғо этник бүленеш; көтөүлектәрҙе бергә файҙаланыу нигеҙендә ойошҡан территориаль берләшмә*)

**АЙМА́ЧНЫЙ**, -ая, -ое аймаҡ …ы; **айма́чное управле́ние** аймаҡ идаралығы; **айма́чный сове́т** аймаҡ ҡоро

**АЙРА́Н** *м* айран; **де́лать айра́н** айран яһау; **пить айра́н** айран эсеү

**А́ЙСБЕРГ** *м* айсберг (*диңгеҙҙә йөҙөп йөрөгән боҙ тауы*); **верши́на а́йсберга** айсберг түбәһе

**АЙСО́РЫ** *мн.*; *уст.* айсорҙар // *ед.* **айсо́р** *м* айсор ир-аты; **айсо́рка** *ж* айсор ҡатын-ҡыҙы; *см.* **ассири́йцы** 1

**АКАДЕМИ́ЗМ** *м* академизм (**1.** *ғилми эштә һәм уҡыу дәрестәрендә фәҡәт теорияға таянған йүнәлеш* **2.** *һынлы сәнғәттә классик үрнәктәргә эйәргән традицияларҙы алған, яңы ағымдарға ҡаршы көрәшкән йүнәлеш*)

**АКАДЕ́МИК** *м* академик; **избира́ться акаде́миком** академик булып һайланыу

**АКАДЕМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** академик, академия ...ы; **академи́ческий уста́в** академия уставы **2.** (*учебный*) академик; **академи́ческий год** академик йыл **3.** (*изданный академией*) академик; **академи́ческое изда́ние** академик баҫма; **академи́ческий слова́рь** академик һүҙлек **4.** (*следующий принципам академизма*) академизм ...ы; **академи́ческая жи́вопись** академизм һынлы сәнғәте **5.** *перен.* (*чисто теоретический*) саф теоретик, академик; **академи́ческий спор** саф теоретик бәхәс ♦ **академи́ческий теа́тр** академия театры

**АКАДЕМИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** академиклыҡ; **академи́чность изображе́ния** һүрәтләүҙәге академиклыҡ **2.** *перен.* тормоштан айырылғанлыҡ, академиклылыҡ; **академи́чность сужде́ния** фекерләүҙең тормоштан айырылған булыуы

**АКАДЕМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **академи́ческий** 4, 5

**АКАДЕ́МИЯ** *ж* академия; **акаде́мия медици́нских нау́к** медицина фәндәре академияһы; **акаде́мия сельскохозя́йственных нау́к** ауыл хужалығы фәндәре академияһы; **Росси́йская акаде́мия нау́к** Рәсәй фәндәр академияһы; **акаде́мия худо́жеств** һынлы сәнғәт академияһы (*һынлы сәнғәт өлкәһендәге юғары мәктәп һәм юғары ғилми ойошма*)

**АКА́НТ** *м* акант (**1.** *бергәрәк йыйылып, ҡабарып торған эре һырлы япраҡлы декоратив үҫемлек* **2.** *архит. ошо үләндең япрағы һымаҡ итеп биҙәлгән кәрниз һ.б.*)

**А́КАНЬЕ** *с см.* **а́кать**

**А́КАТЬ** *несов.* “а”лаштырыу (*урыҫ телендә баҫымһыҙ ижектәрҙә “о” өнөн “а” өнөнә тартым итеп әйтеү*)

**АКА́ЦИЕВЫЙ,** -ая, -ое акация ...ы, сәрүәр ...ы; **ака́циевые лепестки́** акация (аҡ сәрүәр) сәскәһенең таж япрағы

**АКА́ЦИЯ** *ж* акация, сәрүәр ♦ **бе́лая ака́ция** аҡ сәрүәр; **жёлтая ака́ция** һары сәрүәр ағасы

**А́КАЮЩИЙ,** -ая, -ее “а”лашҡан; **а́кающий го́вор** “а”лашҡан һөйләш

**АКВАЛА́НГ** *м* акваланг (*һыу аҫтында тын алыу өсөн махсус аппарат*); **надева́ть аквала́нг** акваланг кейеү

**АКВАЛАНГИ́СТ** *м* аквалангист

**АКВАМАРИ́Н** *м* аквамарин (*минерал, күкһел-йәшел йәки зәңгәр төҫтәге ҡиммәтле таш, берилдың бер төрө*)

**АКВАМАРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* аквамарин; **аквамари́новые се́рьги** аквамарин алҡа; **аквамари́новый цвет** аквамарин төҫө

**АКВАНА́ВТ** *м* акванавт (*һыу аҫтында күҙәтеүҙәр алып барған диңгеҙ тикшеренеүсеһе*)

**АКВАНА́ВТИКА** *ж* акванавтика (*кешенең диңгеҙ аҫтында эшләй алыу мөмкинлеген тикшергән фән*)

**АКВАРЕЛИ́СТ** *м* акварелсе (*акварель менән һүрәт төшөрөүсе рәссам*)

**АКВАРЕ́ЛЬ** *ж* акварель (*һыуҙа иҙелә торған буяу һәм шул буяу менән төшөрөлгән һүрәт*); **писа́ть акваре́лью** акварель менән һүрәт төшөрөү

**АКВАРЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое акварель ...ы, акварель менән яһалған; **акваре́льная вы́ставка** акварель күргәҙмәһе; **акваре́льная те́хника** акварель техникаһы; **акваре́льный рису́нок** акварель менән яһалған һүрәт

**АКВА́РИУМ** *м* аквариум; **содержа́ть в аква́риуме** аквариумда тотоу

**АКВА́РИУМНЫЙ,** -ая, -ое аквариум ...ы; **аква́риумная ры́ба** аквариум балығы; **аква́риумное расте́ние** аквариум үҫемлеге

**АКВАТОРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое акваториаль; **акваториа́льные во́ды** акваториаль һыуҙар; **акваториа́льные измере́ния** акваториаль үлсәүҙәр

**АКВАТО́РИЯ** *ж* акватория (*билдәле сик эсенә ингән һыу өҫтө, һыу ятыу майҙаны*); **аквато́рия гидроаэропо́рта** гидроаэропорт акваторияһы; **аквато́рия Ти́хого океа́на** Тымыҡ океан акваторияһы

**АКВЕДУ́К** *м* акведук (*һыу торбаларын, һуғарыу һәм һыу энергетикаһы каналдарын тәрән соҡорҙар, йылғалар, юлдар аша үткәреү өсөн яһалған күпергә оҡшаш ҡоролма*)

**АКВИЛО́Н** *м*; *трад.-поэт.* төньяҡ еле; **гро́зный аквило́н** дәһшәтле төньяҡ еле

**АККЛИМАТИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое акклиматизация ...ы; **акклиматизацио́нный проце́сс** акклиматизация процесы

**АККЛИМАТИЗА́ЦИЯ** *ж* ерегеү, климатлашыу, яраҡлаштырыу, яраҡлашыу; **акклиматиза́ция расте́ний** үҫемлектәрҙең ерегеүе; **рабо́ты по акклиматиза́ции** климатҡа яраҡлаштырыу эштәре

**АККЛИМАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *кого-что* климатлаштырыу, яраҡлаштырыу, еректереү; **акклиматизи́ровать расте́ния** үҫемлектәрҙе климатлаштырыу

**АККЛИМАТИЗИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов.*, *несов.* климатлашыу, ерегеү, яраҡлашыу; **ры́бы акклиматизи́ровались** балыҡтар климатлашты **2.** *сов.*, *несов.*; *перен.* эйәләшеү, үҙләшеү, ерегеү, яңыға күнегеү **3.** *несов. страд. от* **акклиматизи́ровать**

**АККОМОДАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое аккомодация ...ы

**АККОМОДА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* аккомодация, яраҡлашыу; **аккомода́ция гла́за** күҙҙең яраҡлашыуы (*күҙҙең төрлө алыҫлыҡтағы нәмәне ҡарауға яйлашыу һәләтлеге*)

**АККОМОДИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что*; *спец.* яраҡлаштырыу

**АККОМОДИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аккомоди́ровать**

**АККОМПАНЕМЕ́НТ** *м*; *муз.* аккомпанемент, ҡушылып уйнау; **петь под аккомпанеме́нт** ҡушылып йырлау; **написа́ть аккомпанеме́нт** аккомпанемент яҙыу

**АККОМПАНИА́ТОР** *м* аккомпаниатор, ҡушылып уйнаусы

**АККОМПАНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аккомпани́ровать**

**АККОМПАНИ́РОВАТЬ** *несов.* ҡушылып уйнау, ҡушылыу; **аккомпани́ровать на ба́яне** баянда ҡушылып уйнау; **аккомпани́ровать певи́це** йырсыға ҡушылыу

**АККО́РД I** *м*; *муз.* аккорд (*бер тауыш һымаҡ ҡабул ителгән төрлө юғарылыҡтағы музыкаль тауыштарҙың бергә яңғырауы*); **дава́ть акко́рд** аккорд биреү ♦ **акко́рд струн** ҡылдар аккорды (*һыҙма йәки сиртмә музыка ҡоралдары өсөн ҡылдар йыйылмаһы*); **заключи́тельный акко́рд** һуңғы аккорд, нәтижә

**АККО́РД II** *м*; *уст.* аккорд, килешеү (*билдәле бер эш өсөн түләү шарты*)

**АККОРДЕО́Н** *м* аккордеон; **игра́ть на аккордео́не** аккордеонда уйнау

**АККОРДЕОНИ́СТ** *м* аккордеонсы, аккордеонда уйнаусы

**АККО́РДНО** *нареч.* аккорд буйынса, аккордлы; **рабо́тать акко́рдно** аккордлы эшләү

**АККО́РДНЫЙ,** -ая, -ое аккордлы; **акко́рдный наря́д** аккордлы наряд; **акко́рдная опла́та** аккордлы түләү; **акко́рдная рабо́та** аккордлы эш

**АККО́РДОВЫЙ,** -ая, -ое аккордлы; **акко́рдовая му́зыка** аккордлы музыка

**АККРЕДИТИ́В** *м*; *фин.* аккредитив (*бер кредит ойошмаһының — банкының, һаҡлыҡ кассаһының — икенсеһенә билдәле күләмдәге аҡсаны кемгәлер түләргә бойорған документы*); **дава́ть аккредити́в** аккредитив биреү

**АККРЕДИТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *фин.* **1.** аккредитив ...ы; **аккредити́вное поруче́ние** аккредитив поручениеһы **2.** аккредитивлы; **аккредити́вная фо́рма расчётов** иҫәп-хисаптың аккредитивлы формаһы

**АККРЕДИТОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** *фин.* аккредитлау, вәкил итеп билдәләү (*аҡса алыуға, сауҙа эштәре башҡарыуға*) **2.** *дип.* (вәкил итеп) тәғәйенләү; **аккредитова́ть полномо́чным посло́м** тулы хоҡуҡлы илсе итеп тәғәйенләү

**АККРЕДИТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **аккредитова́ть**

**АККУМУЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аккумули́ровать**

**АККУМУЛИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *спец.* аккумуляция яһау, йыйыу, туплау; **аккумули́ровать эне́ргию** энергия туплау

**АККУМУЛИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.*; *спец.* йыйылыу, тупланыу **2.** *несов. страд. от* **аккумули́ровать**

**АККУМУЛЯ́ТОР** *м*; *тех.* аккумулятор; **заря́дка аккумуля́тора** аккумуляторҙы зарядлау

**АККУМУЛЯ́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое аккумулятор ...ы; **аккумуля́торная батаре́я** аккумулятор батареяһы

**АККУМУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *спец.* аккумуляция, йыйылма, тупланма; **аккумуля́ция эне́ргии** энергия тупланмаһы

**АККУРА́Т** *нареч.*; *прост.* тап, нәҡ; **аккура́т у до́ма останови́лся** тап өй эргәһендә туҡтаны ♦ **в аккура́т:** 1) тап; **в аккура́т пе́ред сном** тап йоҡлар алдынан; 2) тап-таман; **пла́тье в аккура́т** тап-таман күлдәк; **в аккура́те** тейешенсә, ҡушылғанса

**АККУРА́ТНО** *нареч.* **1.** тәртип менән, ыҫпай, бөхтә, йыйнаҡ, ыҡсым итеп; **заверну́ть аккура́тно** ыҡсым итеп төрөү; **одева́ться аккура́тно** ыҫпай кейенеү **2.** һаҡ, һаҡланып, һаҡлыҡ менән, иплэп; **есть аккура́тно** иплэп кенә ашау **3.** *разг.* теүәл, ваҡытында, мәлендә; **аккура́тно отсыла́ть де́ньги** аҡсаны ваҡытында ебәреү; **аккура́тно плати́ть взно́сы** взносты ваҡытында түләп барыу

**АККУРА́ТНОСТЬ** *ж* **1.** ыҫпайлыҡ, бөхтәлек, йыйнаҡлыҡ, ыҡсымлыҡ; **прояви́ть аккура́тность** йыйнаҡлыҡ күрһәтеү **2.** һаҡлыҡ, иплелек **3.** теүәллек; **аккура́тность в рабо́те** эштәге теүәллек

**АККУРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ыҫпай, бөхтә, йыйнаҡ, ыҡсым; **аккура́тный челове́к** ыҫпай кеше; **аккура́тная оде́жда** ыҡсым кейем; **быть аккура́тным** йыйнаҡ булыу **2.** иплe, тәртипле; **аккура́тный в обраще́нии** мөғәмәләһе иплe **3.** теүәл, ваҡытлы; **аккура́тный в рабо́те** эштә теүәл

**АКМЕИ́ЗМ** *м*; *лит.* акмеизм (*урыҫ шиғриәтендә 20 б. башында барлыҡҡа килеп, "сәнғәт сәнғәт өсөн" теорияһын алға һөргән, индивидуализмға өндәгән ағым*)

**АКМЕИ́СТ** *м* акмеизм яҡлы шағир

**АКОНИ́Т** *м* айыутабан (*һары, зәңгәр, зәңгәркүк сәскә атҡан дарыу үләне*)

**АКР** *м* акр (*Америкала, Англияла 4047 кв. метрға тиң булған ер үлсәү берәмеге*)

**АКРИХИ́Н** *м*; *фарм.* акрихин (*хининды алмаштырған малярияға ҡаршы синтетик препарат*)

**АКРИХИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое акрихин ...ы; **акрихи́новый порошо́к** акрихин онтағы

**АКРОБА́Т** *м* и **АКРОБА́ТКА** *ж* акробат; **выступле́ние акроба́тов** акробаттар сығышы

**АКРОБАТИ́ЗМ** *м* акробатизм (*гимнастик номерҙарҙы башҡарғандағы таһыллыҡ, камиллыҡ*)

**АКРОБА́ТИКА** *ж* акробатика (*гимнастика һәм цирк сәнғәте төрө*)

**АКРОБАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** акробатика ...ы; **акробати́ческая шко́ла** акробатика мәктәбе **2.** акробатик; **акробати́ческий но́мер** акробатик номер; **акробати́ческое упражне́ние** акробатик күнекмә

**АКРО́ПОЛЬ** *м* акрополь (*ғәҙәттә, ҡалҡыулыкта урынлашҡан боронғо грек ҡалаһының нығытмалы үҙәк өлөшө; ҡәлғә*)

**АКРОСТИ́Х** *м*; *лит.* акростих (*һәр юлдың баш хәрефенән йәки бер нисә хәрефенән берәй һүҙ йәки фраза килтереп сығарып яҙылған шиғыр*)

**АКСАМИ́Т** *м* аксамит (*беше итеп һуғылған биҙәкле боронғо бәрхәт төрө*)

**АКСАКА́Л** *м* аҡһаҡал, ил ҡарты; **сове́т аксака́лов** аҡһаҡалдар йыйыны

**АКСЕЛЕРА́Т** *м* акселерат (*кәүҙәгә үҙ йәшенә ҡарағанда шәберәк үҫкән үҫмер*)

**АКСЕЛЕРА́ТОР** *м*; *тех.* акселератор (*әйләнеш һанын үҙгәртер өсөн эске яныу газ двигателе цилиндрҙарына яғыулыҡ ағымын көйләп тороусы механизм*)

**АКСЕЛЬБА́НТ** *м* аксельбант (**1.** *хәрб. революцияға тиклемге урыҫ армияһында һәм ҡайһы бер сит ил армияларында форманың иңбашына һалына торған остары, металл суҡ* **2.** *иҫк. лакейҙар кейеменең яурынына тегелгән туҡыма*); **сюрту́к с аксельба́нтами** аксельбантлы сюртук

**АКСЕССУА́Р** *м* аксессуар (**1.** *төрлө кәрәк-яраҡ нәмә* **2.** *нимәгәлер өҫтәмә булған, төп нәмә өсөн фон йәки ниндәйҙер шарт тыуҙырған икенсе дәрәжәләге күренеш, деталь* **3.** *театрҙа сәхнә йыһазы*); **аксессуа́ры романти́ческого Средневеко́вья** Урта быуаттың романтик аксессуарҙары; **аксессуа́ры карти́ны** һүрәттәге аксессуарҙар

**АКСИО́МА** *ж*; *мат.*, *филос.* аксиома (*иҫбатлауһыҙ ҡабул ителгән хәҡиҡәт һәм башҡа тәғлимәттәрҙең дөрөҫлөгөн иҫбатларға нигеҙ булып торған сығанаҡ*); **аксио́мы геоме́трии** геометрияның аксиомалары

**АКСИОМА́ТИКА** *ж* аксиоматика (*теге йәки был фән нигеҙендә ятҡан аксиомалар*)

**АКТ** *м* **1.** (*действие, событие*) эш, хәрәкәт; **акт тво́рчества** ижад эше **2.** (*указ, постановление*) акт; **акт на ве́чное по́льзование землёй** ер менән мәңге файҙаланыу хоҡуғын раҫлаған акт **3.** (*документ*) акт; **акт о переда́че иму́щества** мөлкәтте тапшырыу тураһындағы акт; **обвини́тельный акт** ғәйепләү акты; **соста́вить акт** акт төҙөү **4.** *театр.* бүлек, пәрҙә, шаршау; **коме́дия в трёх а́ктах** өс шаршаулы комедия ♦ **а́кты гражда́нского состоя́ния** гражданлыҡ хәле акттары (*махсус дәүләт органдары тарафынан тыуыу, үлеү, никах, айырылышыу һ.б. фактарҙы теркәү*)

**АКТЁР** *м* **1.** актёр; **выступле́ние актёра** актёр сығышы **2.** *перен.*, *разг.* (*притворщик*) ҡылансыҡ

**АКТЁРСКИЙ,** -ая, -ое актёр ...ы; **актёрская ко́мната** актёрҙар бүлмәһе; **актёрское мастерство́** актёрлыҡ оҫталығы; **актёрская те́хника** актёрлыҡ техникаһы

**АКТЁРСТВО** *с* **1.** актёрлыҡ **2.** *перен.*, *разг.* ҡыланыш, ҡылансыҡлыҡ

**АКТИ́В I** *м* актив; **акти́в кла́сса** синыф активы; **собра́ние акти́ва** актив йыйылышы

**АКТИ́В II** *м* **1.** *фин.* актив (*предприятиеның бөтә булған мал-мөлкәт ҡиммәте*); **акти́в бала́нсового счёта** баланс иҫәбенең активы; **записа́ть в акти́в** активҡа яҙыу **2.** *перен.* уңыштар, ҡаҙаныштар, өҫтөнлөктәр; **записа́ть что́-либо себе́ в акти́в** нимәнелер үҙ ҡаҙанышың иҫәбенә индереү

**АКТИВА́ЦИЯ** *ж* активация (*хәрәкәтһеҙ хәлдән хәрәкәткә килтереү, эшмәкәрлекте көсәйтеү*); **актива́ция моле́кул** молекулалар активацияһы; **актива́ция ферме́нтов** ферменттар активацияһы

**АКТИВИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **активизи́ровать, активизи́роваться**

**АКТИВИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* йәнләндереү, активлаштырыу, активлығын арттырыу; **активизи́ровать наро́д** халыҡты йәнләндереү

**АКТИВИЗИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов.*, *несов.* активлашыу, ҡыҙыу, дәррәүләнеү; **борьба́ активизи́ровалась** көрәш ҡыҙҙы; **рабо́та активизи́руется** эш ҡыҙа **2.** *несов. страд. от* **активизи́ровать**

**АКТИВИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* активациялау

**АКТИВИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **активи́ровать**

**АКТИВИ́СТ** *м* активист, әүҙем кеше; **активи́стка** *ж* актив ҡатын-ҡыҙ, активистка

**АКТИ́ВНОСТЬ** *ж* активлыҡ, әүҙемлек; **подня́ть акти́вность** активлыҡты күтәреү; **проявля́ть акти́вность** активлыҡ күрһәтеү; **акти́вность со́лнца** ҡояш активлығы; **тво́рческая акти́вность** ижади әүҙемлек

**АКТИ́ВНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** *см.* **актив** I; **акти́вная си́ла** актив көс; **акти́вный рабо́чий** актив эшсе; **акти́вный член кружка́** түңәрәктең актив ағзаһы **2.** көслө, тиҙ; **акти́вная хими́ческая реа́кция** көслө химик реакция; **акти́вная оборо́на** көслө оборона ♦ **акти́вное избира́тельное пра́во** актив һайлау хоҡуғы

**АКТИ́ВНЫЙ II,** -ая, -ое *см.* **акти́в** II; **акти́вное иму́щество** актив мөлкәте; **акти́вный бала́нс** актив балансы

**АКТИ́НИЙ** *м* актиний (*радиоактив химик элемент*)

**АКТИ́НИЯ** *ж* актиния (*ҡыуыш эсләләр класына ингән һәрмәүесле диңгеҙ хайуаны*)

**АКТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **акти́ровать**

**АКТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* акт төҙөү; **акти́ровать иму́щество** мөлкәткә акт төҙөү

**АКТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **акти́ровать**

**...А́КТНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "нисә пәрҙәнән (шаршауҙан) торған" мәғәнәһен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.,* **двуха́ктная пье́са** ике шаршаулы пьеса

**А́КТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** акт(тар) ...ы; **а́ктовая бума́га** акттар ҡағыҙы (*төрлө ҡағыҙҙар, килешеүҙәр һ.б. яҙыла торған герблы ҡағыҙ*) **2.** акт(тар) ...ы; **а́ктовый зал** йыйылыштар (тантаналар) залы

**АКТРИ́СА** *ж* актёр ҡатын-ҡыҙ, актриса

**АКТУА́ЛЬНОСТЬ** *ж* актуаллек; **актуа́льность те́мы** теманың актуаллеге; **теря́ть актуа́льность** актуаллекте юғалтыу

**АКТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*современный*) актуа́ль; **актуа́льный вопро́с** актуаль мәсьәлә **2.** *спец.* (*существующий*) актуаль

**АКУ́ЛА** *ж* акула; **бе́лая аку́ла** аҡ акула; **голуба́я аку́ла** зәңгәр акула

**АКУ́ЛИЙ,** -ья, -ье акула ...ы; **аку́льи зу́бы** акула тештәре; **аку́льи плавники́** акула йөҙгөстәре

**АКУ́ЛОВЫЕ** *мн.*; *зоол.* акула һымаҡтар

**АКУ́СТИК** *м* акустик (*акустика өлкәһендәге белгес*)

**АКУ́СТИКА** *ж* акустика (**1.** *физиканың тауыштарҙы өйрәнә торған бүлеге* **2.** *бүлмәлә тауыштың ишетелеү шарты*); **аку́стика конце́ртного за́ла** концерт залының акустикаһы; **зако́ны аку́стики** акустика ҡанундары; **плоха́я аку́стика** насар акустика; **хоро́шая аку́стика** яҡшы акустика

**АКУСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое акустика ...ы; **акусти́ческие усло́вия за́ла** залдың акустика шарттары **2.** акустик; **акусти́ческий аппара́т** акустик аппарат

**АКУШЕ́Р** *м* акушер (*акушерлыҡ буйынса белгес, табип*)

**АКУШЕ́РКА** *ж* акушерка (*бала тапҡанда үҙ аллы ярҙам итергә хоҡуғы булған урта медицина белеменә эйә ҡатын-ҡыҙ*)

**АКУШЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое **1.** акушерҙар ...ы; **акуше́рские ку́рсы** акушерҙар курсы **2.** акушерлыҡ ...ы; **акуше́рская пра́ктика** акушерлыҡ практикаһы

**АКУШЕ́РСТВО** *с* акушерлыҡ (**1.** *медицинаның йөклө ҡатындарға һәм бала тапҡандарға табип ярҙамы күрһәтә торған бүлеге* **2.** *акушер эшмәкәрлеге*)

**АКЦЕ́НТ** *м* акцент (**1.** *лингв. һүҙгә төшкән баҫым, баҫым билдәһе* **2.** *икенсе телде ирекһеҙҙән боҙоп әйтеү* **3.** *ниндәйҙер телгә хас үҙенә бер төрлө һөйләү характеры*); **говори́ть с акце́нтом** акцент менән һөйләү; **произноси́ть слова́ с акце́нтом** һүҙҙәрҙе акцент яһап әйтеү ♦ **де́лать акце́нт** *на чём ниндәйҙер* фекергә баҫым яһау, *нимәгәләр* айырым иғтибар биреү

**АКЦЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* и *без доп.* **1.** *лингв.* акцент билдәһе ҡуйыу **2.** *перен.* фекергә баҫым яһау, айырым иғтибар биреү

**АКЦЕНТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **акценти́ровать**

**АКЦЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **акце́нт** 1; **акце́нтный знак** акцент билдәһе **2.** акцентлы; **акце́нтное произноше́ние** акцентлы һөйләү ♦ **акце́нтный стих** *лит.* акцентлы шиғыр (*баҫымһыҙ һәм баҫымлы ижектәрҙең сиратлашыуының ирекле булыуы, ритм нигеҙенә баҫымлы ижектәр һанының яҡынса тигеҙлеге һалынған саф тоник шиғыр формаһы*)

**АКЦЕНТОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **акценти́ровать**

**АКЦЕНТОЛО́ГИЯ** *ж* **1.** акцентология (*лингв. баҫымдар тураһындағы тәғлимәт, тел ғилемендә баҫымдар системаһын, уларҙың үҫешен йәки билдәле тарихи осорҙағы торошон өйрәнеүсе бүлек*) **2.** *см.* **акцентуа́ция**

**АКЦЕНТУА́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* баҫымдар системаһы; **акцентуа́ция башки́рского языка́** башҡорт теленең баҫымдар системаһы; **акцентуа́ция произведе́ния** әҫәрҙең баҫымдар системаһы

**АКЦЕ́ПТ** *м* акцепт (**1.** *юр. тәҡдим ителгән шартта килешеү төҙөүгә ризалыҡ* **2.** *фин. хужалыҡ ойошмалары араһындағы ҡул аҡсаһыҙ иҫәп формаһы, шулай уҡ аҡса документтарын — счёттарҙы, векселдәрҙе һ.б. — түләүгә ризалыҡ*)

**АКЦЕ́ПТНЫЙ,** -ая, -ое акцепт ...ы; **акце́птная фо́рма расчётов** иҫәпләшеүҙең акцепт формаһы

**АКЦЕПТОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *фин.* акцептлау (*документтар буйынса аҡса түләүҙе раҫлау*); **акцептова́ть счёт** счётты акцептлау

**АКЦЕПТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **акцептова́ть**

**АКЦИ́З** *м* акциз (**1.** *фин. киң ҡулланыу тауарҙарына ситләтелгән һалым* **2.** *иҫк. революцияға тиклемге Рәсәйҙә шул һалымды йыйған идаралыҡ, ойошма*); **обложи́ть акци́зом** акциз һалыу; **служи́ть в акци́зе** акцизда хеҙмәт итеү

**АКЦИ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое акциз ...ы; **акци́зный инспе́ктор** акциз инспекторы; **акци́зный сбор** акциз йыйымы **2.** *в знач. сущ.* **акци́зный** *м*; *уст., разг.* акциз чиновнигы

**АКЦИОНЕ́Р** *м* акционер (*акциялар хужаһы, акционерҙар предприятиеһында ҡатнашыусы кеше*)

**АКЦИОНЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое акционер(ҙар) ...ы; **акционе́рная компа́ния** акционерҙар компанияһы; **акционе́рное о́бщество** акционерҙар йәмғиәте; **акционе́рный капита́л** акционерҙар капиталы

**А́КЦИЯ I** *ж* акция (*предприятиеға өлөш индергәнде белдергән, уның эшендә һәм табышында ҡатнашырға хоҡуҡ биргән ҡиммәтле ҡағыҙ*); **дохо́дная а́кция** керемле акция; **приобрета́ть а́кции** акция һатып алыу; ♦ **а́кции повыша́ются** *чьи* әһәмиәте (дәрәжәһе) күтәрелә; **а́кции па́дают** *чьи* әһәмиәте (йоғонтоһо) кәмей (төшә)

**А́КЦИЯ II** *ж*; *книжн.* акция, сығыш (*ниндәйҙер маҡсатҡа ирешеү өсөн башҡарылған эш*); **вое́нная а́кция** һуғыш акцияһы; **дипломати́ческая а́кция** дипломатик акция

**АКЫ́Н** *м* аҡын; **тво́рчество акы́нов** аҡындар ижады

**АЛБА́НСКИЙ,** -ая, -ое албан ...ы, Албания...ы; **алба́нский наро́д** албан халҡы; **алба́нский язы́к** албан теле

**АЛБА́НЦЫ** *мн.* албандар, албан халҡы // *ед.* **алба́нец** *м* албан, албан ир-аты; **алба́нка** *ж* албан ҡатын-ҡыҙы

**А́ЛГЕБРА** *ж* алгебра; **уро́к а́лгебры** алгебра дәресе

**АЛГЕБРАИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** алгебраик; **алгебраи́ческое выраже́ние** алгебраик аңлатма; **алгебраи́ческое число́** алгебраик һан **2.** алгебра ...ы; **алгебраи́ческие уравне́ния** алгебра тигеҙләмәләре

**АЛГОРИ́ТМ** *м*; *мат.* алгоритм; **алгори́тм извлече́ния ко́рня из числа́** һандан тамыр алыу алгоритмы

**АЛЕБА́РДА** *ж* алебарда (*осо һөңгө менән барып бөткән оҙон һаплы айбалта, боронғо ҡорал*)

**АЛЕБА́СТР** *м* алебастр; **произво́дство алеба́стра** алебастр етештереү

**АЛЕБА́СТРОВЫЙ,** -ая, -ое алебастр ...ы; **алеба́стровый заво́д** алебастр заводы

**АЛЕКСАНДРИ́ЙСКИЙ: александри́йский стих** *лит.* александрия шиғыры (*өсөнсө стопанан һуң пауза (цезура) яһалған ун ике йәки ун өс ижектән торған алты стопалы ямб шиғыры*)

**АЛЕКСАНДРИ́Т** *м* александрит (*көн яҡтыһында ҡуйы зөбәржәт йәшел төҫтәге, яһалма яҡтылыҡта ҡара ҡыҙыл төҫкә ингән ҡиммәтле таш*)

**АЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*выделяться алым цветом*) алһыуланып тороу (күренеү); **вдали́ але́ют ма́ки** алыҫта мәктәр алланып күренә **2.** (*становиться алым*) алланыу, алһыуланыу, ал төҫкә инеү; **горизо́нт але́ет** офоҡ алһыулана

**АЛЕУ́ТСКИЙ,** -ая, -ое алеут ...ы; **алеу́тский наро́д** алеут халҡы; **алеу́тский язы́к** алеут теле

**АЛЕУ́ТЫ** *мн.* алеуттар, алеут халҡы (*Алеут һәм Командор утрауҙарының төп халҡы*) // *ед.* **алеу́т** *м* алеут ир-аты; **алеу́тка** *ж* алеут ҡатын-ҡыҙы

**АЛЖИ́РЦЫ** *мн.* алжирҙар, алжир халҡы // *ед.* **алжи́рец** *м* алжир ир-аты; **алжи́рка** *ж* алжир ҡатын-ҡыҙы

**А́ЛИ** и **АЛЬ** *союз*; *уст. см.* **и́ли**

**А́ЛИБИ** *с нескл.*; *юр.* алиби (*енәйәт эшләнгән ваҡытта гәйепләнеүсенең енәйәт ҡылынған урында булмауы*); **доказа́ть своё а́либи** үҙенең алибийын иҫбатлау; **приводи́ть а́либи в своё оправда́ние** үҙеңде аҡлап алиби килтереү

**АЛИЗАРИ́Н** *м*; *хим.* ализарин (*марена тамырынан йәки яһалма юл менән алынған буяусы матдә*)

**АЛИЗАРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое ализарин; **ализари́новая кра́ска** ализарин буяу

**АЛИМЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое алимент ...ы; **алиме́нтные дела́ в суде́** судтағы алимент юллау эштәре

**АЛИМЕ́НТЩИК** *м* и **АЛИМЕ́НТЩИЦА** *ж* алимент түләүсе

**АЛИМЕ́НТЫ** *мн.* алимент; **плати́ть алиме́нты** алимент түләү; **получа́ть алиме́нты** алимент алыу

**АЛКАЛО́ИД** *м*; *хим.* алкалоид (*көслө физиологик тәьҫирле һелте характерындағы азотлы органик матдә*)

**АЛКАЛО́ИДНЫЙ**, -ая, -ое алкалоид ...ы; **алкало́идный раство́р** алкалоид иретмәһе

**АЛКА́ТЬ** *несов.*; *книжн.*, *уст.* **1.** асығыу **2.** *чего* и *с неопр.* бик ныҡ теләү

**АЛКОГОЛИ́ЗМ** *м* алкоголизм, эскеселек, эскелек; **борьба́ про́тив алкоголи́зма** алкоголизмға ҡаршы көрәш, эскелеккә ҡаршы көрәш; **лечи́ться от алкоголи́зма** алкоголизмдан дауаланыу

**АЛКОГО́ЛИК** *м* и **АЛКОГОЛИ́ЧКА** *ж* алкоголик эскесе

**АЛКОГО́ЛЬ** *м* **1.** алкоголь, иҫерткес эсемлек(тәр); **де́йствие алкого́ля** иҫерткес эсемлек тәьҫире, алкоголь тәьҫире **2.** *мн.* **алкого́ли** *хим.* алкоголдәр (*кислород менән водород төркөмдәренән торған органик берләшмәләр*)

**АЛКОГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** спиртлы, алкоголле, иҫерткес; **алкого́льные напи́тки** алкоголле эсемлектәр, спиртлы эсемлектәр **2.** алкоголь ...ы; **алкого́льная промы́шленность** алкоголь сәнәғәте; **алкого́льное возде́йствие** алкоголь тәьҫире **3.** алкоголь тыуҙырған, алкоголдән булған; **алкого́льное отравле́ние** алкоголдән ағыуланыу

**АЛЛА́Х** *м* Алла ♦ **алла́х зна́ет (ве́дает)** алла белә, бер кемгә билдәһеҙ; **одному́ алла́ху изве́стно** алла үҙе генә белә, бер кем дә белмәй

**АЛЛЕГОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое аллегорик, кинәйәле, ситләтеп әйтелгән; **аллегори́ческий жанр** аллегорик жанр; **аллегори́ческий о́браз** аллегорик образ; **аллегори́ческий приём** аллегорик алым

**АЛЛЕГОРИ́ЧНЫЙ,** -ая -ое *см.* **аллегори́ческий**; **аллегори́чное выска́зывание** аллегорик һүҙ (хәбәр), кинәйәле (ситләтеп) һөйләү

**АЛЛЕГО́РИЯ** *ж* аллегория (*абстракт төшөнсәне һын менән әйтеп биреү алымы*); ситләтеп әйтелгән, кинәйәле һүҙ

**АЛЛЕГРЕ́ТТО** *муз.* аллегретто (**1.** *урта тиҙлектә музыка әҫәрен башҡарыу темпы* **2.** *уртаса темпта башҡарыла торған музыка әҫәре йәки уның бер өлөшө*)

**АЛЛЕ́ГРИ** *с нескл.*; *уст.* аллегри (*отошо шунда уҡ түләнә торған лотерея*)

**АЛЛЕ́ГРО** *муз.* **1.** *нареч.* тиҙ, йәнле (*музыка әҫәрен башҡарыу темпы тураһында*) **2.** *с нескл.* аллегро (*шәп темпта башҡарыла торған музыка әҫәре йәки уның бер өлөшө*)

**АЛЛЕРГЕ́Н** *м* аллерген (*аллергия тыуҙырыусы матдә*)

**АЛЛЕРГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое аллергия …ы, аллергик; **аллерги́ческое заболева́ние** аллергик ауырыу

**АЛЛЕРГИ́Я** *ж* аллергия (*ярһытҡыстарҙың тәьҫиренә организмдың нормаль булмаған реакцияһы*)

**АЛЛЕРГО́ЛОГ** *м* аллерголог, аллергология белгесе

**АЛЛЕРГОЛО́ГИЯ** *ж* аллергология (*медицинаның бер тармағы*)

**АЛЛЕ́Я** *ж* аллея; **алле́я ака́ций** сәрүәр аллеяһы; **берёзовая алле́я** ҡайын аллеяһы; **гуля́ть по алле́е** аллея буйлап йөрөү

**АЛЛИГА́ТОР** *м* аллигатор (*Америкала һәм Көньяҡ Ҡытайҙа осраған крокодил төрө*)

**АЛЛИТЕРА́ЦИЯ** *ж*; *лит.* аллитерация (*нәфис телмәрҙең тәьҫирен көсәйтеү өсөн һүҙҙәрҙә бер төрлө тартынҡыларҙы билдәле тәртиптә туплап биреү алымы*); **явле́ние аллитера́ции в стихотворе́нии** шиғырҙағы аллитерация күренеше

**АЛЛО́** *межд.* алло; **алло́, вы слу́шаете меня́?** алло, һеҙ мине тыңлайһығыҙмы?

**АЛЛОПА́Т** *м* аллопат (*аллопатия ысулдарын ҡулланыусы табип*)

**АЛЛОПА́ТИЯ** *ж*; *мед.* аллопатия (*гомеопатияға ҡапма-ҡаршы булған, ғәҙәти дауалау системаһы*)

**АЛЛОТРОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое аллотропик; **аллотропи́ческие видоизмене́ния** аллотропик төр үҙгәртеүҙәр

**АЛЛОТРО́ПИЯ** *ж*; *хим.* аллотропия (*бер үк элементтың төрлө ябай матдәләр барлыҡҡа килтерә алыу үҙенсәлеге*)

**АЛЛЮВИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аллювиаль; **аллювиа́льные отложе́ния** аллювиаль ҡатламдар

**АЛЛЮ́ВИЙ** *м*; *геол.* аллювий (*ағар һыуҙар йөгөнтөһөндә барлыҡҡа килгән ҡатламдар — һарыҡташтар, ҡомдар, ҡырсынташтар һ.б.*)

**АЛЛЮ́Р** *м* аллюр (*аттың хәрәкәт рәүеше, йөрөшө: атлау, юртыу, һикертеү, сабыу һ.б.*); **разнови́дности аллю́ра** аттың хәрәкәт төрҙәре, аллюр төрҙәре

**АЛМА́З** *м*; *мин.* алмас; **добыва́ть алма́зы** алмас табыу ♦ **алма́з ре́жут то́лько алма́зом** алмасты алмас менән ҡырҡалар

**АЛМА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** алмас …ы; **алма́зное месторожде́ние** алмас ятҡылығы; **2.** алмас; **алма́зный стеклоре́з** алмас быяла ҡырҡҡыс; **алма́зное ожере́лье** бриллиант (гәүһәр) муйынсаҡ

**АЛМАЗОДОБЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее алмас сығарыу; **алмазодобыва́ющая промы́шленность** алмас сығарыу сәнәғәте

**АЛМАЗОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое алмаслы; **алмазоно́сный пласт** алмаслы ҡатлам

**АЛОГИ́ЗМ** *м* алогизм, логикаһыҙлыҡ (*логик эҙмә-эҙлелеге булмаған, ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер һәм телмәр*)

**АЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* эҙмә-эҙлекһеҙ, логикаһыҙ

**АЛОГИ́ЧНОСТЬ** *ж*; *книжн.* эҙмә-эҙлекһеҙлек, логикаһыҙлыҡ

**АЛОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **алоги́ческий**

**АЛО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое алоэ …ы; **ало́йный сок** алой һуты; **ало́йный лист** алой япрағы

**А́ЛО-РО́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое аллы-гөллө

**АЛО́Э** *с нескл.* алой, йөҙйәшәр

**АЛТА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое алтай, Алтай …ы; **алта́йская поро́да ове́ц** алтай тоҡомло һарыҡ; **алта́йский язы́к** алтай теле; **алта́йские языки́** алтай телдәре

**АЛТА́ЙЦЫ** *мн.* алтайҙар, алтай халҡы (*Алтай Республикаһының төп халҡы*) // *ед.* **алта́ец** *м* алтай ир-аты; **алта́йка** *ж* алтай ҡатын-ҡыҙы

**АЛТА́РЬ** *м* алтарь, миһрап (**1.** *тәңтормош халыҡтарында ҡорбан сала торған урын* **2.** *сиркәүҙә төп залдың түре*) ♦ **возложи́ть (принести́) на алта́рь оте́чества (иску́сства, нау́ки, любви́ и т.п.)** *что* ватан (сәнғәт, фән, мөхәббәт һ.б.) өсөн ҡорбан итеү

**АЛТЕ́Й** *м* бесәй тырнағы (борсағы), һиҙәп үләне

**АЛТЕ́ЙКА** *ж*; *разг.* бесәй борсағы төнәтмәһе

**АЛТЫ́Н** *м*; *уст.* барнау (*боронғо Рәсәйҙәге өс тинлек баҡыр аҡса*)

**АЛФАВИ́Т** *м* алфавит; **ара́бский алфави́т** ғәрәп алфавиты; **расположи́ть по алфави́ту** алфавит тәртибендә урынлаштырыу, алфавит буйынса урынлаштырыу

**АЛФАВИ́ТНЫЙ,** ая, -ое **1.** алфавит …ы; **писа́ть в алфави́тном поря́дке** алфавит тәртибендә

яҙыу; **2.** алфавитлы; **алфави́тный спи́сок** алфавитлы исемлек; **алфави́тный указа́тель** алфавитлы күрһәткес

**АЛХИ́МИК** *м* алхимик (*алхимия менән шөғөлләнгән кеше*)

**АЛХИ́МИЯ** *ж* алхимия (*урта быуаттарҙа ғилми химияға тиклем йәшәгән, ябай металдан алтын — “философия ташы” алыу юлдарын эҙләгән мистик тәғлимәт*)

**А́ЛЧНОСТЬ** *ж* ҡомһоҙлоҡ, ҡомағайлыҡ, хиреслек; **а́лчность к деньга́м** аҡсаға ҡомһоҙлоҡ

**А́ЛЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡомһоҙ, ҡомағай, хирес; **а́лчный челове́к** ҡомһоҙ кеше

**А́ЛЫЙ,** -ая, -ое ал, аҡһыл-ҡыҙыл, алһыу; **а́лая заря́** алһыу таң; **а́лый флаг** ал флаг; **станови́ться а́лым** алһыуланыу

**АЛЫЧА́** *ж* алса (*ағасы һәм емеше*)

**АЛЫЧО́ВЫЙ,** -ая, -ое алса ...ы; **алычо́вое варе́нье** алса ҡайнатмаһы

**АЛЬБАТРО́С** *м* альбатрос (*оҙонса суҡышлы, оҙон тар ҡанатлы ҙур диңгеҙ ҡошо*); **белосне́жный альбатро́с** аҡ һыртлы альбатрос; **темноспи́нный альбатро́с** ҡуңыр һыртлы альбатрос

**АЛЬБИНИ́ЗМ** *м* альбинизм (*тәнгә төҫ биргән меланик пигменттың тыумыштан булмауы*); **альбини́зм живо́тных** хайуандарҙағы альбинизм

**АЛЬБИНО́С** *м* альбинос (*альбинизм хас булған үҫемлек йәки йән эйәһе*)

**АЛЬБО́М** *м* альбом; **альбо́м фотосни́мков** фотолар альбомы; **чертёжный альбо́м** һыҙмалар альбомы; **писа́ть в альбо́м** альбомға яҙыу

**АЛЬБО́МНЫЙ,** -ая, -ое альбом ...ы; **альбо́мный лист** альбом бите

**АЛЬБУМИ́НЫ** *мн.*; *биохим.* аҡһымдар, альбуминдар (*һыуҙа иреүсән ябай тәбиғи аҡһымдар төркөмө*)

**АЛЬВЕО́ЛЫ** *мн.*; *анат.* **1.** үпкә ҡыуыҡсаһы **2.** теш соҡоро

**АЛЬКО́В** *м* стеналағы ҡыуышлыҡ (*карауат ҡуйыр өсөн стенаға инә бирелеп эшләнгән урын*)

**АЛЬМАНА́Х** *м* альманах (*төрлө яҙыусыларҙың әҫәрҙәренән тупланған әҙәби йыйынтыҡ*); **литерату́рный альмана́х** әҙәби альманах; **выпуска́ть альмана́х** альманах сығарыу

**АЛЬПЕНШТО́К** *м* альпеншток (*бейек тауҙарға, боҙлоҡтарға менгәндә ҡулланыла торған башы осло тимерле оҙон таяҡ*)

**АЛЬПИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое (*высокогорный*) бейек тау ...ы; **альпи́йская расти́тельность** бейек тау үҫемлектәре; **альпи́йские луга́** бейек тау туғайлыҡтары; **альпи́йские па́стбища** бейек тау көтөүлектәре

**АЛЬПИНА́РИЙ** *м* альпинарий (*баҡсаның йәки парктың бейек тау үҫемлектәре үҫкән ташлы тау һымаҡ өлөшө*)

**АЛЬПИНИА́ДА** *ж* альпиниада (*альпинистарҙың күмәк походы*)

**АЛЬПИНИ́ЗМ** *м* тау туризмы, альпинизм; **занима́ться альпини́змом** альпинизм менән шөғөлләнеү

**АЛЬПИНИ́СТ** *м* и **АЛЬПИНИ́СТКА** *ж* альпинист, тау турисы

**АЛЬПИНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое альпинистар ...ы; **альпини́стский ла́герь** альпинистар лагеры; **альпини́стский клуб** альпинистар клубы

**АЛЬТ** *м*; *муз.* альт (**1.** *балаларҙың ҡалын тауышы* **2.** *хорҙа балаларҙың йәки ҡатын-ҡыҙҙың ҡалын тауышы менән башҡарылған партия* **3.** *түбән регистрлы ҡыллы йәки тынлы музыка ҡоралы*)

**АЛЬТЕРА́ЦИЯ** *ж*; *муз.* альтерация (*тауыштың ярты йәки бер тонға күтәрелеүе йәки төшөүе*)

**АЛЬТЕРНАТИ́ВА** *ж* альтернатива (**1.** *бер-береһенә ҡаршы торған ике йәки бер нисә мөмкинселек араһынан береһен һайлап алыу хәжәте* **2.** *шундай хәжәттең һәр береһе*); **име́ть альтернати́ву** альтернативалы булыу

**АЛЬТЕРНАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** альтернатив; **альтернати́вная кандидату́ра на вы́борах** һайлауҙа күрһәтелгән альтернатив кандидатура; **альтернати́вная постано́вка вопро́са** мәсьәләнең альтернатив ҡуйылышы **2.** альтернативалы; **альтернати́вное обяза́тельство** альтернативалы йөкләмә

**АЛЬТИМЕ́ТР** *м*; *ав.* альтиметр (*осоу бейеклеген билдәләй торған самолёт приборы*)

**АЛЬТИ́СТ** *м* и **АЛЬТИ́СТКА** *ж* альтсы (*альтта уйнаусы музыкант*)

**АЛЬТО́ВЫЙ,** -ая, -ое альт ...ы; **альто́вый тон** альт тоны, ҡалын тауыш

**АЛЬТРУИ́ЗМ** *м* альтруизм (*башҡалар тураһында эскерһеҙ хәстәрлек һәм үҙеңдең шәхси мәнфәғәтеңде ҡорбан итергә әҙерлек*)

**АЛЬТРУИ́СТ** *м* и **АЛЬТРУИ́СТКА** *ж* альтруист (*үҙенең эшендә альтруизм принциптарына таянған кеше*)

**АЛЬТРУИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое альтруистик; **альтруисти́ческий посту́пок** альтруистик ҡылыҡ

**АЛЬТРУИСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* альтруислыҡ

**АЛЬТРУИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **альтруисти́ческий**

**А́ЛЬФА** *ж* альфа (*грек алфавитындағы беренсе хәрефтең атамаһы*) ♦ **а́льфа и оме́га** *чего* *нимәнең* башы һәм ахыры; **от а́льфы до оме́ги** башынан аҙағына тиклем

**А́ЛЬФА-ЛУЧИ́** *мн.*; *физ.* альфа-нурҙар (*ҡайһы бер радиоактив матдәләр тарҡалғанда барлыҡҡа килгән ыңғай зарядлы альфа-өлөшсәләр — гелий атомы ядроларының ағымы*); **пото́к а́льфа-луче́й** альфа-нурҙар ағымы

**А́ЛЬФА-РАСПА́Д** *м*; *физ.* альфа-тарҡалыш (*үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән радиоактив тар-*

*ҡалыш ваҡытында атом ядроларының альфа-өлөшсәләр таратыуы)*

**А́ЛЬФА-ЧАСТИ́ЦА** *ж*; *физ.* альфа-өлөшсә (*ике протондан һәм ике нейтрондан торған гелий атомы ядроһы*)

**АЛЬЯ́НС** *м* альянс, союз (*килешеү йөкләмәһе нигеҙендә барлыҡҡа килгән берекмә*)

**АЛЮМИ́НИЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** алюминий ...ы; **алюми́ниевая промы́шленность** алюминий сәнәғәте **2.** (*содержащий алюминий*) алюминлы; **алюми́ниевые спла́вы** алюминлы иретмәләр **3.** (*сделанный из алюминия*) алюмин; **алюми́ниевая ло́жка** алюмин ҡалаҡ

**АЛЮМИ́НИЙ** *м* алюмин (*химик элемент, металл*); **гидри́д алюми́ния** алюмин гидриды; **нитра́т алюми́ния** алюмин нитраты; **сульфа́т алюми́ния** алюмин сульфаты; **о́кись алюми́ния** алюмин әсемәһе

**АЛЯПОВА́ТОСТЬ** *ж* тупаҫлыҡ, йәмһеҙлек

**АЛЯПОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*грубо, безвкусно сделанный*) тупаҫ (йәмһеҙ) эшләнгән; **аляпова́тые карти́нки** йәмһеҙ эшләнгән һүрәттәр **2.** (*грубый, некрасивый*) тупаҫ, йәмһеҙ; **аляпова́тое лицо́** йәмһеҙ йөҙ

**АМАЗО́НКА** *ж* амазонка (**1.** *махсус кейем кейгән һыбай ҡатын-ҡыҙ* **2.** *уст. һыбай йөрөү өсөн махсус өлгө менән тегелгән оҙон ҡатын-ҡыҙ күлдәге*)

**АМАЗО́НКИ** *мн.*; *миф.* амазонкалар (*боронғо грек мифологияһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына ойошҡан ҡәбилә*)

**АМАЛЬГА́МА** *ж* **1.** амальгама (*ниндәйҙер металдың терегөмөш менән ҡушылмаһы йәки металдың терегөмөштәге иҙмәһе*); **ци́нковая амальга́ма** цинклы амальгама **2.** *перен.* (*запутанность, неразбериха*) буталсыҡ, сыуалсыҡ; **амальга́ма жи́зни** тормош буталсығы (сыуалсығы) **3.** *перен.* (*разногласие, разброд*) үҙ-ара ҡаршылыҡ, тарҡаулыҡ; **амальга́ма иде́й** идеялар тарҡаулығы

**АМАЛЬГАМА́ЦИЯ** *ж* амальгамация (*ҡайһы бер металдарҙың амальгама биреү үҙенсәлегенә нигеҙләнеп, терегөмөш ярҙамында мәғдәндән саф металл алыу ысулы*)

**АМАЛЬГАМИ́РОВАНИЕ** *с см.* **амальгами́ровать**

**АМАЛЬГАМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** амальгама яһау, металды терегөмөштә иретеү **2.** (*покрыть слоем амальгамы*) амальгамалау, амальгама һөртөү (яғыу); **амальгами́ровать зе́ркало** көҙгөнө амальгамалау, көҙгөгә амальгама яғыу

**АМАЛЬГАМИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **амальгами́ровать**

**АМАЛЬГА́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** амальгамалы; **амальга́мные соедине́ния** амальгамалы берләшмәләр **2.** амальгама ...ы; **амальга́мная пло́мба** амальгама пломбаһы

**АМАРИ́ЛЛИС** *м* ҡамыш гөлө; **цвето́к амари́ллиса** ҡамыш гөлө сәскәһе

**АМАРИ́ЛЛИСОВЫЕ** *мн.*; *бот.* ҡамыш гөлдәр ғаиләһе

**АМБА́Р** *м* оҙон келәт, амбар; **хле́бный амба́р** иген келәте

**АМБА́РНЫЙ,** -ая, -ое амбар ...ы; **амба́рная дверь** келәт ишеге; **амба́рный замо́к** келәт йоҙағы; **амба́рная кни́га** амбар кенәгәһе (*мал-мөлкәтте теркәй торған дәфтәр*)

**АМБИЦИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое амбициялы; **амбицио́зный челове́к** амбициялы кеше

**АМБИ́ЦИЯ** *ж* амбиция, мин-минлек, тәкәбберлек, эрелек; **челове́к с амби́циями** тәкәббер кеше ♦ **вломи́ться (уда́риться) в амби́цию** бик ныҡ үпкәләү, сәмләнеп, тулап китеү

**А́МБРА** *ж* **1.** ғәмбәр **2.** *уст.* (*духи, аромат*) хушбуй, хуш еҫ

**АМБРАЗУ́РА** *ж* **1.** *воен.* амбразура (*төрлө хәрби нығытмаларҙа, бронялы башняларҙағы орудиенан, миномёттан, пулемёттан һ.б. атыу өсөн яһалған тишек*); **амбразу́ра дзо́та** дзот амбразураһы; **амбразу́ра та́нка** танк амбразураһы; **стреля́ть из амбразу́ры** амбразуранан атыу **2.** *архит.* ишек, тәҙрә уйымы

**АМБРО́ЗИЯ** *ж* амброзия (*боронғо грек мифологияһында аллаға мәңгелек йәшлек, матурлыҡ биргән хуш еҫле аш*)

**АМБУЛАТО́РИЯ** *ж* амбулатория (*мөрәжәғәт итеүсе ауырыуҙарға һәм өйҙә медицина ярҙамы күрһәтеүсе дауалау учреждениеһы*); **объединённая амбулато́рия** берләштерелгән амбулатория

**АМБУЛАТО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** амбулатор; **амбулато́рное лече́ние** амбулатор дауаланыу; **амбулато́рный больно́й** амбулатор ауырыу; **амбулато́рный приём** амбулатор ҡабул итеү; **2.** амбулатория ...ы; **амбулато́рный врач** амбулатория табибы (врачы)

**АМВО́Н** *м* амвон, мөнбәр

**АМЁБА** *ж* амёба (*бер күҙәнәкле иң ябай йән эйәһе*); **го́лые амёбы** яланғас амёбалар; **дизентери́йная амёба** дизентерия амёбаһы

**АМЕРИКАНИЗА́ЦИЯ** *ж* американлаштырыу, американлашыу

**АМЕРИКА́НСКИЙ,** -ая, -ое американ, Америка ...ы; **америка́нский матери́к** Америка материгы; **америка́нский клён** америка сағаны

**АМЕРИКА́НЦЫ** *мн.* американдар, америкалылар, Америка халҡы // *ед.* **америка́нец** *м* американ; **америка́нка** *ж* американ ҡатын-ҡыҙ

**АМЕТИ́СТ** *м* аметист (*зәңгәр, күк йәки көрән төҫтәге аҫыл таш, кварцтың бер төрө*)

**АМЕТИ́СТОВЫЙ,** -ая, -ое аметист ...ы; **амети́стовый при́иск** аметист приискыһы **2.** аметист, аметистан яһалған; **амети́стовые се́рьги** аметист алҡа

**АМИ́НЬ** *частица утверд.*; *рел.* амин, аллаһы әкбәр

**АММИА́К** *м*; *хим.* аммиак (*азот менән водородтың берләшмәһенән торған еҫле төҫһөҙ газ*); **газообра́зный аммиа́к** газ һымаҡ аммиак; **жи́дкий аммиа́к** шыйыҡ аммиак; **твёрдый аммиа́к** ҡаты аммиак; **конденса́ция аммиа́ка** аммиак конденсацияһы

**АММИА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое аммиак ...ы, аммиаклы; **аммиа́чная сели́тра** аммиак селитраһы; **аммиа́чная вода́** аммиаклы һыу; **аммиа́чный заво́д** аммиак заводы

**АММОНА́Л** *м* аммонал (*шартлатҡыс матдә*)

**АММО́НИЙ** *м*; *хим.* аммоний (**1.** *күп тоҙҙар составына инеп, техникала һәм ауыл хужалығында киң ҡулланылған азот менән водород атомдары төркөмө* **2.** *әсетке урынына ҡулланылған онтаҡ*); **со́ли аммо́ния** аммоний тоҙҙары; **сульфа́т аммо́ния** аммоний сульфаты; **хло́ристый аммо́ний** хлорлы аммоний

**АММОНИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое аммоний ...ы; **аммони́йные со́ли** аммоний тоҙҙары

**АМНИСТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **амнисти́ровать**

**АМНИСТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого* амнистияға эләктереү, амнистия буйынса ҡотҡарыу (ирекка ебәреү)

**АМНИСТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* амнистияға эләгеү, амнистия буйынса ҡотолоу (ирекка сығыу)

**АМНИ́СТИЯ** *ж* амнистия (*суд ҡарары менән хөкөм ителгән кешенең юғары власть органдары тарафынан ирекка тулыһынса йәки өлөшләтә сығарылыуы*); **о́бщая амни́стия** дөйөм амнистия; **части́чная амни́стия** өлөшләтә амнистия; **попа́сть под амни́стию** амнистияға эләгеү

**АМОРАЛИ́ЗМ** *м* боҙоҡлоҡ, тәртипһеҙлек (*әхлаҡ нормаларының инҡар ителеше*)

**АМОРА́ЛЬНОСТЬ** *ж* әхлаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, боҙоҡлоҡ, тәртипһеҙлек; **амора́льность поведе́ния** холоҡ әҙәпһеҙлеге

**АМОРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әхлаҡһыҙ, амораль, әҙәпһеҙ; **амора́льный челове́к** әхлаҡһыҙ кеше; **амора́льный посту́пок** әҙәпһеҙ ҡылыҡ

**АМОРТИЗА́ТОР** *м*; *тех.* амортизатор (*төрлө машиналар һәм аппараттарҙа бәрелепһуғылыуҙы кәметеү өсөн ҡулайлама*); **пружи́нный амортиза́тор** пружиналы амортизатор

**АМОРТИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое амортизация ...ы; амортизацион; **амортизацио́нные сро́ки** амортизация мөҙҙәте; **амортизацио́нные расхо́ды** амортизация сығымдары; **амортизацио́нные устро́йства** амортизация ҡоролмалары

**АМОРТИЗА́ЦИЯ** *ж* амортизация (**1.** *икт. туҙыу арҡаһында төп фондтарҙың — машинаның, йорттоң һ.б. — хаҡы төшә барыуы* **2.** *фин. машина, йорт һ.б. ҡиммәтенең эшләп сығарылған продукция хаҡына күсерелеүе* **3.** *тех. махсус ҡорамалдар ярҙамында техниканың бәрелеү-һуғылыу көсөнөң йомшартылыуы*); **отчисле́ние на амортиза́цию** амортизацияға бирелгән аҡса

**АМОРТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* амортизациялау, амортизация яһау

**АМОРТИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* амортизацияланыу, амортизация яһалыу

**АМО́РФНОСТЬ** *ж*; *книжн.* аморфлыҡ, формаһыҙлыҡ

**АМО́РФНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *мин., хим.* аморф, кристалл төҙөлөшлө булмаған (кристаллашмаған); **амо́рфное вещество́** аморф матдә; **амо́рфный углеро́д** аморф углерод **2.** *книжн.* формаһыҙ, тарҡау; **амо́рфное произведе́ние** формаһыҙ әҫәр ♦ **амо́рфные языки́** аморф телдәр (*һүҙҙәрендә үҙгәртеүсе формалар булмаған телдәр*)

**АМПЕ́Р** *м*; *физ.* ампер (*электр тоғының көсөн үлсәү берәмеге*); **абсолю́тный ампе́р** абсолют ампер; **междунаро́дный ампе́р** халыҡ-ара ампер

**АМПЕРМЕ́ТР** *м*; *физ., тех.* амперметр (*электр тоғының көсөн үлсәй торған прибор*)

**АМПИ́Р** *м*; *иск.* ампир (*XIX б. башында Францияла антик үрнәктәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән сәнғәт стиле; һуңғы классицизм*)

**АМПЛИТУ́ДА** *ж*; *физ.* амплитуда, хәрәкәт, тирбәлеш аралығы; **амплиту́да колеба́ния** тирбәлеш амплитудаһы; **амплиту́да рассе́ивания** таралыу (сәселеү) амплитудаһы; **годова́я амплиту́да температу́ры** температураның йыллыҡ амплитудаһы

**АМПЛУА́** *с нескл.* **1.** амплуа (*артистың башҡарыу һәләтенә тап килгән билдәле рол- дәр*) **2.** *перен.* (*круг занятий, положение*) эш даирәһе, тотҡан урын

**А́МПУЛА** *ж*; *мед.* ампула (*дарыу һаҡлау өсөн герметик рәүештә ямалған быяла көпшә*); **лека́рство в а́мпулах** ампулала сығарылған дарыу

**АМПУТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ампутация ...ы, киҫелгән, ҡырҡылған

**АМПУТА́ЦИЯ** *ж*; *мед.* ампутация(лау), киҫеү, ҡырҡып ташлау (*тән өлөшөнөң хирургик юл менән ҡырҡып алыныуы*); **ампута́ция ноги́** аяҡты киҫеү

**АМПУТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* ампутациялау, ампутация яһау, киҫеү; **ампути́ровать ру́ку** ҡулға ампутация яһау, ҡулды ампутациялау

**АМУЛЕ́Т** *м* бетеү, тылсым; **пове́сить амуле́т** бетеү тағыу

**АМУНИ́ЦИЯ** *ж*; *уст.* **1.** амуниция, ғәскәри кәрәк-яраҡ (*хәрбиҙәрҙең ҡорал менән кейемһалымдан тыш үҙе менән йөрөтөргә тейешле кәрәк-ярағы*); **амуни́ция военнослу́жащего** хәрбиҙәр амуницияһы (кәрәк-ярағы) **2.** ғәскәри ҡамыт-дуға; **ко́нская амуни́ция** хәрби аттың ҡамыт-дуғаһы



2 зак. 2.0084.05

**АМУ́Р** *м*; *миф*. **1.** мөхәббәт аллаһы, амур (*антик мифологияла*: *гәҙәттә, уҡ-ян тотҡан ҡанатлы малай рәүешендә һүрәтләнгән мөхәббәт аллаһы*) **2.** *мн*. **аму́ры** *прост*., *уст*. мөхәббәт мажаралары

**АМУ́РНИЧАТЬ** *несов*.; *уст*., *прост*. мөхәббәт бәйләнештәре менән сыуалыу

**АМУ́РНЫЙ,** -ая, -ое *уст*., *прост*. мөхәббәт ...ы; **аму́рная исто́рия** мөхәббәт мажараһы; **аму́рные дела́** мөхәббәт эштәре

**АМФИ́БИЯ** *ж* амфибия (**1.** *зоол*. **амфи́бии** *мн*. *ер-һыу хайуандары класы* **2.** *бот*. **амфи́бии** *мн*. *ер-һыу үҫемлектәре* **3.** *ерҙән дә, һыуҙан да күтәрелеп китә һәм ергә төшә лә алған самолёт, ерҙә һәм һыуҙа йөрөй алған танк һәм машина*)

**АМФИБРА́ХИЙ** *м*; *лит*. амфибрахий (*силлабо-тоник шиғыр төҙөлөшөндә баҫымы икенсе ижегенә төшкән өс ижекле стопа*)

**АМФИБРАХИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое амфибрахий ...ы, амфибрахик; **амфибрахи́ческий разме́р** амфибрахик үлсәм

**АМФИТЕА́ТР** *м* амфитеатр (**1.** *Боронғо Грецияла һәм Римда*: *баҫҡыс-баҫҡыс итеп эшләнгән ярым түңәрәк тамаша урыны* **2.** *театр. тамаша залының партеры артындағы баҫҡыс-баҫҡыс булып күтәрелгән ултырғыстар рәте һәм залдың шул ултырғыстар торған ярым түңәрәк өлөшө*)

**АНАБИО́З** *м*; *биол*. анабиоз (*ҡайһы бер йән эйәләренең, уларҙың ағзаларының эшмәкәрлеге туҡталып, уңайлы шарттарҙа яңынан терелеп китеү күренеше*); **анабио́з микроорганизмов** микроорганизмдар анабиозы; **впада́ть в анабио́з** анабиозға төшөү

**АНАГРА́ММА** *ж*; *лит*. анаграмма (*яңы һүҙ яһау өсөн һүҙҙәге хәрефтәрҙе алмаштырыу, мәҫ.*, *"кат" — "так", "кас" — "сак" һ.б.*); **составля́ть анагра́ммы** анаграммалар төҙөү

**АНАКО́НДА** *ж* анаконда (*иң эре быуар йылан*)

**АНАКРЕОНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лит*. анакреонтик; **анакреонти́ческая о́да** анакреонтик ода; **анакреонти́ческая поэ́зия** анакреонтик шиғриәт

**АНА́ЛИЗ** *м* анализ, тикшереү; **ана́лиз кро́ви** ҡан анализы; **ана́лиз по́чвы** тупраҡ анализы; **диагности́ческий ана́лиз** диагностик анализ; **математи́ческий ана́лиз** математик анализ; **логи́ческий ана́лиз** логик анализ; **хими́ческий ана́лиз** химик анализ; **брать ана́лиз** анализ алыу

**АНАЛИЗА́ТОР** *м* анализатор (**1.** *тех*. *матдәләрҙе, күренештәрҙе анализлай торған төрлө приборҙар* **2.** *физиол*. *кеше һәм хайуан организмдарында тышҡы һәм эске мөхиттән ҡабул иткән ҡуҙғытҡыстарға анализ яһаған нервылар — тойоу органдары һәм уға тап килгән мейе участогы, уларҙы бәйләгән нервы юлдары*); **анализа́тор га́зов** газ анализаторы; **анализа́тор зре́ния** күҙ анализаторы

**АНАЛИЗИ́РОВАНИЕ** *с см*. **анализи́ровать**

**АНАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов*. *что* анализлау, анализ яһау, тикшереү, өйрәнеү; **анализи́ровать кровь** ҡанды анализлау; **анализи́ровать уро́к** дәресте анализлау, дәрескә анализ яһау

**АНАЛИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов*. *страд*. *от* **анализи́ровать**

**АНАЛИ́ТИК** *м* аналитик (**1.** *төрлө-төрлө анализдар яһау менән шөғөлләнгән белгес* **2.** *бөтә тирә-яҡты, уҙенең кисерештәрен, ҡылығын һ.б. анализларға һәләтле кеше*)

**АНАЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*основанный на анализе*) анализ ...ы; **аналити́ческий ме́тод** анализ ысулы **2.** (*способный к анализу*) анализлаусы, аналитик; **аналити́ческий ум** аналитик аҡыл **3.** (*служащий для анализа*) аналитик; **аналити́ческие весы́** анализлаусы үлсәү ♦ **аналити́ческая геоме́трия** аналитик геометрия; **аналити́ческая хи́мия** аналитик химия; **аналити́ческие языки́** аналитик телдәр

**АНА́ЛОГ** *м*; *книжн*. аналог, оҡшашлыҡ; **не имеющий ана́лога** аналогы булмаған

**АНАЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое (*основанный на аналогии*) аналогик, оҡшаш; **аналоги́ческий ме́тод** аналогик (оҡшаш) ысул

**АНАЛОГИ́ЧНО** *нареч*. оҡшаш; **аналоги́чно пе́рвому** тәүгеһенә оҡшаш

**АНАЛОГИ́ЧНОСТЬ** *ж* оҡшашлыҡ, берҙәйлек

**АНАЛОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (*сходный, подобный*) аналогик (оҡшаш); **аналоги́чное явле́ние** аналогик күренеш, оҡшаш күренеш; **аналоги́чный слу́чай** оҡшаш хәл; **аналоги́чные усло́вия** оҡшаш шарттар

**АНАЛО́ГИЯ** *ж* оҡшашлыҡ, аналогия; **истори́ческая анало́гия** тарихи аналогия, тарихи оҡшашлыҡ; **по́лная анало́гия** тулы аналогия; **части́чная анало́гия** өлөшләтә аналогия, өлөшләтә оҡшашлыҡ

**АНАЛЬГИ́Н** *м*; *мед*. анальгин (*ауыртыуҙы баҫа, температураны төшөрә һәм шеште бөтөрә торған дарыу*)

**АНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *анат*. артҡы; **ана́льное отве́рстие** артҡы тишек

**АНА́МНЕЗ** *м*; *мед*. анамнез (*ауырыуға килтергән шарттар*; *ауырыу кешенең тормошо, ауырыуы һ.б. хаҡында алынған мәғлүмәттәр*); **ана́мнез насле́дственный** нәҫел анамнезы

**АНАНА́С** *м* ананас (*тропик үҫемлек һәм уның емеше*); **ли́стья анана́са** ананас япрағы

**АНАНА́СНЫЙ,** -ая, -ое ананас ...ы; **анана́сное варе́нье** ананас ҡайнатмаһы; **анана́сные консе́рвы** ананас консерваһы

**АНАНА́СОВЫЙ,** -ая, -ое *см*. **анана́сный**; **анана́совый сок** ананас һуты

**АНА́ПЕСТ** *м*; *лит.* анапест (*силлабо-тоник шиғыр төҙөлөшөндә баҫымы өсөнсө ижеккә төшкән өс ижекле стопа*)

**АНАРХИ́ЗМ** *м* анархизм (*дәүләт власын инкар итеү, уға ҡаршы сығыу, башбаштаҡлыҡҡа саҡырыу*); **идео́логия анархи́зма** анархизм идеологияһы; **сторо́нник анархи́зма** анархизм яҡлы кеше

**АНАРХИ́СТ** *м* анархист; **выступле́ние анархи́стов** анархистар сығышы

**АНАРХИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое анархистар ...ы; **анархи́стская организа́ция** анархистар ойошмаһы; **анархи́стские взгля́ды** анархистар ҡарашы

**АНАРХИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** анархик; **анархи́ческое тече́ние** анархик ағым **2.** анархизм ...ы; **анархи́ческая идеоло́гия** анархизм идеологияһы

**АНАРХИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** анархислыҡ; **анархи́чность взгля́дов** анархислыҡ ҡараштары **2.** тәртипһеҙлек, башбаштаҡлыҡ

**АНАРХИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **анархи́ческий 2.** тәртипһеҙ, башбаштаҡ; **анархи́чный посту́пок** тәртипһеҙ ҡылыҡ

**АНА́РХИЯ** *ж*; *полит.* власһыҙлыҡ, анархия (**1.** *йәмғиәттең дәүләт хакимиәте, ҡанундары, мәжбүри тәртип ҡағиҙәләре булмаған торошо* **2.** *анархизмға хас дәүләтте, ҡанундарҙы танымау* **3.** *тәртипһеҙлек, башбаштаҡлыҡ*); **ана́рхия произво́дства** сәнәғәт анархияһы; **госпо́дство ана́рхии** анархия хакимлығы

**АНА́РХО-СИНДИКАЛИ́ЗМ** *м*; *полит.* анархо-синдикализм (*халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтендә анархизмдың идеологик һәм сәйәси йүнәлештәге ағым*)

**АНА́РХО-СИНДИКАЛИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** анархо-синдикалистик; **ана́рхо-синдикали́стская тео́рия** анархо-синдикализм теорияһы **2.** анархо-синдикалист ...ы; **ана́рхо-синдикали́стская гру́ппа** анархо-синдикалистик төркөм

**АНА́ТОМ** *м* анатом, анатомия белгесе

**АНАТОМИ́РОВАНИЕ** *с см.* **анатоми́ровать**

**АНАТОМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* мәйет ярыу

**АНАТОМИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **анатоми́ровать**

**АНАТОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** анатомия ...ы; **анатоми́ческий а́тлас** анатомия атласы **2.** анатомик; **анатоми́ческие иссле́дования** анатомик тикшеренеүҙәр ♦ **анатоми́ческий теа́тр** анатомия театры (*ғилми-уҡыу учреждениеһында мәйетте ярыу һәм препараттар яһау өсөн махсус йыһазландырылған бина*)

**АНАТОМИ́ЧКА** *ж*; *разг. см.* **анатоми́ческий теа́тр**

**АНАТО́МИЯ** *ж* **1.** анатомия (*тере организмдың формаһын һәм төҙөлөшөн өйрәнгән фән*); **анато́мия живо́тных** хайуандар анатомияһы; **анато́мия челове́ка** кеше анатомияһы; **анато́мия расте́ний** үҫемлектәр анатомияһы **2.** тән төҙөлөшө; **анато́мия гла́за** күҙ төҙөлөшө

**АНА́ФЕМА** *ж* **1.** *церк.* диндән һөрөү, ҡыуыу **2.** *бран.* (*проклятие*) динһеҙ, ләғин, мәлғүн ♦ **преда́ть ана́феме** хурлыҡ тамғаһы һуғыу (ғәйепләнеү)

**АНА́ФОРА** *ж*; *лит.* анафора (*йәнәш торған юлда, строфала оҡшаш юл, строфа, һөйләм ҡабатланыу алымы*)

**АНАХРОНИ́ЗМ** *м* анахронизм (**1.** *тәбиғи хронологияны боҙоп, бер осор ваҡиға, күренештәрен икенсе осорға күсереп күрһәтеү* **2.** *иҫкелек ҡалдығы*)

**АНАХРОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое анахроник; **анахрони́ческое явле́ние** анахроник күренеш

**АНАХРОНИ́ЧНОСТЬ** *ж* анахрониклыҡ; **анахрони́чность изложе́ния** һөйләү (яҙыу) анахрониклығы

**АНАХРОНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое анахроник; **анахрони́чный взгляд** анахроник ҡараш

**АНАЭРО́БНЫЙ,** -ая, -ое *биол.* **1.** (*являющийся анаэробом*) анаэроб; **анаэро́бные бакте́рии** анаэроб бактериялар **2.** (*вызываемый анаэробами*) анаэроблы; **анаэро́бная инфе́кция** анаэроблы инфекция

**АНАЭРО́БЫ** *мн.*; *биол.* анаэробтар (*ирекле кислород булмаған шарттарҙа йәшәй һәм үрсей алған организмдар*); **стро́гие анаэро́бы** төҙөк анаэробтар; **усло́вные анаэро́бы** шартлы анаэробтар

**АНГАЖЕМЕ́НТ** *м*; *уст.*, *театр.* ангажемент (*артистарҙы килешеү буйынса билдәле ваҡытҡа эшкә саҡырыу*); **име́ть ангажеме́нт** ангажементлы булыу

**АНГАЖИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого*; *уст.* **1.** ангажемент тәҡдим итеү **2.** бейеүгә саҡырыу

**АНГАЖИ́РОВАТЬСЯ** *уст.* **1.** *сов., несов.* ангажемент ҡабул итеү, алыу; **ангажи́роваться на гастро́ли** гастролдәргә ангажемент алыу **2.** *несов. страд. от* **ангажи́ровать**; **ангажи́роваться на вальс** вальс бейергә саҡырылыу

**АНГА́Р** *м* ангар (*самолёт һаҡлана һәм ремонт яһала торған махсус бина*)

**АНГА́РНЫЙ,** -ая, -ое ангар ...ы; **анга́рная пло́щадь** ангар майҙаны; **анга́рное иму́щество** ангар милке

**А́НГЕЛ** *м* **1.** *рел.* фәрештә **2.** *перен.* иң яҡшы өлгө, идеал; **а́нгел доброты́** изгелек өлгөһө; **а́нгел красоты́** матурлыҡ өлгөһө **3.** *перен.*, *ласк.* һөйөклө кеше (*ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ*); **а́нгел мой** һөйөклөм ♦ **пра́вое крыло́ а́нгела** фәрештәнең уң ҡанаты (*яҡшы кеше тураһында*)

**АНГЕЛО́ЧЕК** *м*; *уст.*, *разг.*, *ласк. от* **а́нгел** 1, 3; **ангело́чек на не́бе** күктәге фәрештә

**А́НГЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое **1.** фәрештә ...ы; **а́нгельское терпе́ние** фәрештә түҙемлеге **2.** *перен.* һөйкөмлө, мөләйем, яғымлы; нәфис;

**а́нгельская улы́бка** мөләйем йылмайыу; **а́нгельский го́лос** нәфис тауыш

**АНГИДРИ́Д** *м*; *хим.* ангидрид (*һыу менән ҡушҡанда кислота барлыҡҡа килтерә торған әсемә*); **се́рный ангидри́д** көкөрт ангидриды

**АНГИДРИ́Т** *м*; *мин.* ангидрит (**1.** *һыу менән ҡушҡанда гипс барлыҡҡа килтереүсе минерал, көкөрт әсемәле кальций* **2.** *төрлө нәмәләр яһай торған зәңгәрһыу йәки һарғылт төҫтәге таш*); **месторожде́ние ангидри́та** ангидрит ятҡылығы

**АНГИ́НА** *ж*; *мед.* ангина (*тамаҡ ауырыуы*); **фолликуля́рная анги́на** фолликуляр ангина

**АНГЛИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое инглиз ...ы, Англия...ы; **англи́йский язы́к** инглиз теле

**АНГЛИКА́НСКИЙ,** -ая, -ое англикан; **англика́нская це́рковь** англикан сиркәүе

**АНГЛИЦИ́ЗМ** *м* англицизм (*инглиз теленән үҙләштерелгән һүҙ йәки әйтем*)

**АНГЛИЧА́НЕ** *мн.* инглиздәр, инглиз халҡы // *ед.* **англича́нин** *м* инглиз ир-аты; **англича́нка** *ж* инглиз ҡатын-ҡыҙы

**АНГЛОМА́Н** *м* англоман (*инглизсә булған бөтә нәмә менән мауыҡҡан кеше*)

**АНГЛОМА́НИЯ** *ж* англоманлыҡ

**АНГЛОФИ́Л** *м* англофил (*инглиз милләтен, мәҙәниәтен һөйөүсе кеше*)

**АНГЛОФИ́ЛЬСТВО** *с* англофиллыҡ (*инглиз милләтенә, мәҙәниәтенә баш әйеү*)

**АНГЛОФО́Б** *м* англофоб (*инглиз милләтен, мәҙәниәтен яратмаған кеше*)

**АНГЛОФО́БСТВО** *с* англофоблыҡ (*инглиз милләтен, мәҙәниәтен яратмау*)

**АНГО́РСКИЙ,** -ая, -ое ангор ...ы; **анго́рская коза́** ангор кәзәһе; **анго́рская ко́шка** ангор бесәйе

**АНДА́НТЕ** *муз.* **1.** *нареч.* уртаса темптағы, һалмаҡ, талғын (*музыка әҫәрен башҡарыу тиҙлегенә ҡарата*) **2.** *с нескл.* анданте (*уртаса тиҙлектә уйнала торған музыка әҫәре йәки уның бер өлөшө*)

**АНЕВРИ́ЗМ** *м* и **АНЕВРИ́ЗМА** *ж*; *мед.* аневризм (*ситтәре үҙгәреү йәки зыянланыу һөҙөмтәһендә аорта эсендә бер урында барлыҡҡа килгән киң өлөш*)

**АНЕКДО́Т** *м* **1.** анекдот, көләмәс **2.** (*необычный случай*) мәҙәк, мәрәкә; **анекдо́т с ним случи́лся** уның менән мәҙәк хәл булды

**АНЕКДОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** көлкөлө; **анекдоти́ческий расска́з** көлкөлө хикәйә, көләмәс **2.** (*маловероятный, небывалый*) мәҙәк, кеше ышанмаҫлыҡ; **анекдоти́ческая жизнь** мәҙәк тормош

**АНЕКДОТИ́ЧНОСТЬ** *ж* мәҙәклек, мәрәкә, ҡыҙыҡ хәл

**АНЕКДОТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **анекдоти́ческий** 2

**АНЕМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* аҙ ҡанлы; **анеми́ческое состоя́ние** аҙ ҡанлылыҡ

**АНЕМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **анеми́ческий** **2.** *перен.* хәлһеҙ, бәлтерәк, быуынһыҙ **3.** *перен.* төҫһөҙ, ҡобараһы осҡан, төҫө ҡасҡан

**АНЕМИ́Я** *ж*; *мед.* аҙ ҡанлылыҡ, анемия; **насле́дственная анеми́я** нәҫелдән килгән аҙ ҡанлылыҡ; **симпто́мы анеми́и** анемия симптомдары (билдәләре)

**АНЕМО́МЕТР** *м* анемометр (*һауаның хәрәкәт тиҙлеген, көсөн үлсәй торған прибор*); **анемо́метр ручно́й** ҡул анемометры; **кры́льчатый анемо́метр** ҡанатлы анемометр

**АНЕМО́Н** *м* и **АНЕМО́НА** *ж* елбәҙәк үлән

**АНЕРО́ИД** *м*; *метеор.* анероид (*атмосфера баҫымын үлсәй торған барометр*)

**АНЕСТЕЗИО́ЛОГ** *м* анестезиолог, анестезия белгесе

**АНЕСТЕЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого*; *мед.* ауыртыуҙы бөтөрөү (кәметеү)

**АНЕСТЕЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **анестези́ровать**

**АНЕСТЕЗИ́РУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **анестези́ровать** **2.** *прил.* ауыртыуҙы бөтөрөүсе (кәметеүсе); **анестези́рующее вещество́** ауыртыуҙы бөтөрөүсе матдә

**АНЕСТЕЗИ́Я** *ж*; *мед.* **1.** анестезия, тышҡы ҡуҙғытҡыстарҙы (ауыртыуҙы) һиҙмәү (тоймау); **по́лная анестези́я** тулы анестезия; **части́чная анестези́я** өлөшләтә һиҙмәү **2.** анестезия, ауыртыуҙы һиҙмәҫлек итеү (туңдырыу); **о́бщая анестези́я** дөйөм анестезия; **ме́стная анестези́я** айырым ағзаны “туңдырыу”; сикләнгән анестезия

**АНИЛИ́Н** *м*; *хим.* анилин (*буяуҙар, дарыуҙар, шартлатҡыс матдәләр һ.б. әҙерләгәндә ҡулланылған майлы, төҫһөҙ ағыулы шыйыҡлыҡ*)

**АНИЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** анилин ...ы; **анили́новая кислота́** анилин кислотаһы; **анили́новая соль** анилин тоҙо **2.** (*приготовленный из анилина*) анилинлы; **анили́новые краси́тели** анилинлы буяуҙар

**АНИМАЛИ́СТ** *м*; *иск.* анималист (*башлыса, хайуандарҙы төшөргән рәссам йәки һынсы*)

**АНИМИ́ЗМ** *м* анимизм (*һәр нәмәнең йәне бар тип иҫәпләгән тәүтормош кешеләренә хас ҡараш*)

**АНИМИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое анимистик; **анимисти́ческие представле́ния** анимистик фараз итеү (ҡараш)

**АНИ́С** *м* **1.** (*растение*) әнис **2.** (*сорт яблок*) әнис алмаһы

**АНИ́СОВКА** *ж*; *разг.* **1.** *бот.* (*сорт яблок*) әнис алмаһы **2.** (*водка*) әнис араҡыһы

**АНИ́СОВЫЙ,** -ая, -ое әнис, баҙыян ...ы; **ани́совое де́рево** әнис (баҙыян) ағасы; **ани́совое ма́сло** әнис (баҙыян) майы; **ани́совая во́дка** әнис араҡыһы

**А́НКЕР** *м* анкер (**1.** *сәғәт теленең хәрәкәтен көйләгән өлөшө* **2.** *ҡоролманың өлөштәрен бергә тоташтырған тимер деталь*)

**А́НКЕРНЫЙ,** -ая, -ое анкерлы; **а́нкерный болт** анкерлы болт; **часы́ на а́нкерном ходу́** анкерлы сәғәт

**АНКЕ́ТА** *ж* анкета; **заполня́ть анке́ту** анкета тултырыу; **распространя́ть анке́ту** анкета таратыу

**АНКЕТИ́РОВАНИЕ** *с* анкета тултырыу (үткәреү); **проводи́ть анкети́рование** анкета тултыртыу (үткәреү)

**АНКЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое анкета ...ы; **анке́тные да́нные** анкета мәғлүмәттәре

**АННА́ЛЫ** *мн.* (*летопись*) анналдар, йылъяҙмалар ♦ **в анна́лах исто́рии** тарих биттәрендә

**АННЕКСИОНИ́СТ** *м* аннексия яҡлы кеше

**АННЕКСИОНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое аннексия ...ы; **аннексиони́стская поли́тика** аннексия сәйәсәте

**АННЕКСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое аннексия ...ы; **аннексио́нный акт** аннексия акты

**АННЕКСИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аннекси́ровать**

**АННЕКСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*, аннексия яһау, аннексиялау; **аннекси́ровать террито́рию** территорияны аннексиялау

**АННЕ́КСИЯ** *ж*; *полит.* аннексия (*бер дәүләттең икенсе бер дәүләтте көсләп үҙенә ҡушыуы*); **скры́тая анне́ксия** йәшерен аннексия

**АННОТА́ЦИЯ** *ж* аннотация, ҡыҫҡаса йөкмәтке; **о́бщая аннота́ция** дөйөм аннотация; **специализи́рованная аннота́ция** махсус аннотация; **составля́ть (писа́ть) аннота́цию** аннотация төҙөү (яҙыу)

**АННОТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аннoти́ровать**

**АННОТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* аннотация яһау, аннотациялау; **аннoти́ровать кни́гу** китапҡа аннотация яҙыу, китапты аннотациялау

**АННОТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аннoти́ровать**

**АННУЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аннули́ровать**

**АННУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, ғәмәлдән (көсөнән) сығарыу; **аннули́ровать догово́р** килешеүҙе ғәмәлдән сығарыу; **аннули́ровать постановле́ние** ҡарарҙы юҡҡа сығарыу

**АННУЛИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аннули́ровать**

**АННУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* юҡҡа сығарыу, ғәмәлдән сыҡҡан тип табыу (*ҡанунды, ҡарарҙы, килешеүҙе һ.б.*)

**АНО́Д** *м*; *физ.* анод (*ыңғай зарядлы электрод*)

**АНО́ДНЫЙ,** -ая, -ое анод ...ы; **ано́дная батаре́я** анод батареяһы; **ано́дный ток** анод тогы

**АНОМА́ЛИЯ** *ж* аномалия, тайпылыш; **анома́лия в ро́сте** буй-һын аномалияһы; **магни́тная анома́лия** магнит тайпылышы

**АНОМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аномаль, тайпылышлы; **анома́льное разви́тие** аномаль (тайпылышлы) үҫеш; **анома́льное состоя́ние** аномаль хәл; **анома́льное явле́ние** аномаль күренеш

**АНОНИ́М** *м* аноним (**1.** *әҫәрендә, хатында үҙенең исемен йәшергән автор* **2.** *автор исеме ҡуйылмаған хат йәки әҫәр*)

**АНОНИ́МКА** *ж*; *разг.* **1.** имзаһы, ҡултамғаһы ҡуйылмаған хат **2.** авторы билдәһеҙ хат

**АНОНИ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аноним, ҡултамғаһыҙ, имзаһыҙ; **анони́мный доно́с** ҡултамғаһыҙ ошаҡ; **анони́мное письмо́** аноним хат **2.** исеме билдәһеҙ, ҡул ҡуйылмаған; **анони́мный а́втор** исеме билдәһеҙ автор, ҡултамғаһын ҡуймаған автор

**АНОНИ́МЩИК** *м* анонимсы

**АНО́НС** *м* анонс (*буласаҡ гастролдәр, спектаклдәр, концерттар һ.б. тураһында алдан яһалған белдереү*); **афи́ша с ано́нсом** анонслы афиша

**АНОНСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что, о чём* алдан белдереү, иғлан итеү

**АНОНСИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **анонси́ровать**

**АНОРМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* анормаль, нормаль булмаған, нормаль түгел; **анорма́льное явле́ние** нормаль булмаған күренеш

**АНО́ФЕЛЕС** *м* тапма серәкәйе

**АНСА́МБЛЕВЫЙ,** -ая, -ое ансамбль ...ы, ансамбль менән; **анса́мблевое пе́ние** ансамбль менән йырлау; **анса́мблевые пье́сы** ансамбль пьесаһы

**АНСА́МБЛЬ** *м*; *в разн. знач.* ансамбль; **анса́мбль пе́сни и пля́ски** йыр һәм бейеү ансамбле; **архитекту́рный анса́мбль** архитектура ансамбле; **стру́нный анса́мбль** ҡыллы ансамбль

**АНТАГОНИ́ЗМ** *м* ҡапма-ҡаршылыҡ, антагонизм; **кла́ссовый антагони́зм** синфи ҡапма-ҡаршылыҡ; **антагони́зм в биоло́гии** биологиялағы антагонизм; **антагони́зм в о́бществе** йәмғиәттәге ҡапма-ҡаршылыҡ

**АНТАГОНИ́СТ** *м* антагонист (**1.** *нимә менәндер килешмәгән, ҡапма-ҡаршы фекерҙә торған кеше* **2.** *мн.* **антагони́сты** *биол. функциялары йәки тәьҫир итешеце менән ҡапма-ҡаршы булған ағзалар йәки матдәләр*)

**АНТАГОНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*непримиримо враждебный*) килешә алмаҫлыҡ синыфтар, бер-береһенә ҡаршы торған синыфтар **2.** (*полный антагонизма*) антагонистик; **антагонисти́ческие противоре́чия** антагонистик ҡаршылыҡтар

**АНТАГОНИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **антагонисти́ческий**

**АНТА́РКТИКА** *ж* Антарктика (*Ер шарының көньяҡ поляр өлкәһе*)

**АНТАРКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** Антарктика ...ы; **антаркти́ческий матери́к** Антарктика материгы; **антаркти́ческая о́бласть** Антарктика өлкәһе **2.** (*свойственный Антарктике*) антарктик; **антаркти́ческий кли́мат** антарктик климат; **антаркти́ческий по́яс** антарктик бүлкәт **3.** (*находящийся в Антарктике*) антарктик;

**антаркти́ческая экспеди́ция** антарктик экспедиция; **антаркти́ческая ста́нция** антарктик станция

**АНТЕ́ННА** *ж* антенна; **приёмная анте́нна** ҡабул итеү антеннаһы; **передаю́щая анте́нна** тапшырыусы антенна; **телевизио́нная анте́нна** телевизион йәки телевизор антеннаһы

**АНТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое антенна ...ы; **анте́нное обору́дование** антенна ҡорамалдары

**АНТИ...** (*нимәгәлер ҡаршы йәки дошман булғанлыҡты белдергән приставка*)

**АНТИАЛКОГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** алкоголгә ҡаршы; **антиалкого́льное сре́дство** алкоголгә ҡаршы сара **2.** алкоголизмға ҡаршы; **антиалкого́льный зако́н** алкоголизмға ҡаршы закон (ҡанун)

**АНТИБИО́ТИКИ** *мн.* (*ед.* **антибио́тик** *м*); *биол.*, *мед.* антибиотиктар (*микроорганизмдарҙан барлыҡҡа килгән бактерия*; *микробтарҙың үсешен туҡтатҡан йәки уларҙы үлтерергә һәләтле химик матдәләр*)

**АНТИВОЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое һуғышҡа ҡаршы; **антивое́нная демонстра́ция** һуғышҡа ҡаршы демонстрация

**АНТИГОСУДА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое дәүләткә ҡаршы

**АНТИДЕМОКРАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое демократияға ҡаршы, антидемократик; **антидемократи́ческая поли́тика** демократияға ҡаршы сәйәсәт; **антидемократи́ческие избира́тельные зако́ны** антидемократик һайлау ҡанундары

**АНТИДИАЛЕКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое диалектик ҡанундарҙан тыш, диалектикаға ҡаршы; **антидиалекти́ческая оце́нка истори́ческих собы́тий** тарихи ваҡиғаларҙы диалектика ҡанундарынан тыш баһалау

**АНТИИМПЕРИАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антиимпериалистик, империализмға ҡаршы; **антиимпериалисти́ческое движе́ние** антиимпериалистик хәрәкәт, империализмға ҡаршы хәрәкәт; **междунаро́дный антиимпериалисти́ческий ла́герь** империализмға ҡаршы халыҡ-ара лагерь

**АНТИИСТОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тарихилыҡҡа ҡаршы, тарихи булмаған; **антиистори́ческий подхо́д** тарихилыҡҡа ҡаршы мөнәсәбәт

**АНТИКВА́Р** *м* антиквар (**1.** *боронғо нәмәләрҙе, китаптарҙы һ.б. һатыусы* **2.** *иҫк. боронғо сәнғәт әҫәрҙәрен, иҫке, һирәк осрай торған китаптарҙы һ.б. йыйған, шуның менән мауыҡҡан кеше*)

**АНТИКВАРИА́Т** *м* антиквариат (*боронғо ҡиммәтле китаптар, һүрәттәр, нәмәләр менән һатыу итеү эше*)

**АНТИКВА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*старинный и ценный*) антиквар, боронғо ҡиммәтле; **антиква́рные кни́ги** антиквар китаптар; **антиква́рные ве́щи** боронғо ҡиммәтле нәмәләр **2.** боронғо ҡиммәтле нәмәләр менән; **антиква́рный магази́н** боронғо ҡиммәтле нәмәләр менән һатыу иткән магазин

**АНТИКОЛОНИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое антиколониаль, колониализмға ҡаршы; **антиколониа́льная борьба́** колониализмға ҡаршы көрәш; **антиколониа́льная поли́тика** антиколониаль сәйәсәт

**АНТИКОММУНИ́ЗМ** *м* антикоммунизм (*коммунизмға ҡаршы идеология һәм сәйәсәт*); **вои́нственный антикоммуни́зм** һуғышсан антикоммунизм; **ло́зунги антикоммуни́зма** коммунизмға ҡаршы лозунгылар

**АНТИКОММУНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антикоммунистик, коммунизмға ҡаршы

**АНТИЛО́ПА** *ж* антилопа (*көйшәүсе һөтимәр хайуан*)

**АНТИМАРКСИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое антимарксистик, марксизмға ҡаршы; **антимаркси́стская тео́рия** марксизмға ҡаршы теория

**АНТИМАТЕРИАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антиматериалистик, материализмға ҡаршы; **антиматериалисти́ческие воззре́ния** материализмға ҡаршы ҡараштар

**АНТИМИЛИТАРИ́ЗМ** *м* антимилитаризм (*милитаризм һәм империалистик һуғыш сәйәсәтенә ҡаршы халыҡ-ара хәрәкәт*)

**АНТИМИЛИТАРИ́СТ** *м* антимилитаризм яҡлы кеше, антимилитарист

**АНТИМИЛИТАРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антимилитаристик, милитаризмға ҡаршы; **антимилитаристи́ческая кампа́ния** антимилитаристик кампания, милитаризмға ҡаршы кампания

**АНТИМИЛИТАРИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **антимилитаристи́ческий**

**АНТИМО́НИЯ: разводи́ть антимо́нии** *разг.* юҡ-бар һөйләү, ләстит һатыу

**АНТИНАРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое халыҡ мәнфәғәтенә ҡаршы, халыҡҡа ҡаршы

**АНТИНАУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое фәнни булмаған, фәнгә ҡаршы; **антинау́чные реакцио́нные тео́рии** фәнни булмаған реакцион теориялар

**АНТИНО́МИЯ** *ж*; *филос.*, *лог.* антиномия (*дөрөҫ тип ҡаралған, ләкин бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған ике төп фекер араһындағы ҡаршылыҡ*)

**АНТИОБЩЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое йәмғиәткә зарарлы, йәмәғәтселеккә ҡаршы; **антиобще́ственный посту́пок** йәмғиәткә зарарлы эш; **антиобще́ственное поведе́ние** йәмәғәтселеккә ҡаршы ҡылыҡ (холоҡ)

**АНТИПАРТИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое партия принциптарына ҡаршы килгән, партияға ҡаршы; **антиparти́йный блок** партияға ҡаршы блок; **антипарти́йная вы́ходка** партияға ҡаршы эш

**АНТИПАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*отвращающий*) ерәнгес, сирҡаныс; **антипати́ческое чу́вство** ерәнгес тойғо **2.** (*отталкивающий*) биҙ-

ҙергес, һөйкөмһөҙ; **антипати́ческий вид** һөйкөмһөҙ ҡиәфәт

**АНТИПА́ТИЯ** *ж* антипатия, яратмау тойғоһо, кире тойғо; **внуши́ть антипа́тию** кире тойғо уятыу

**АНТИПО́Д** *м* **1.** *геогр. мн.* **антипо́ды** антиподтар (*Ер шарының ҡапма-ҡаршы ике яғында йәшәгән кешеләр*) **2.** *перен.* кире ҡарашлы кеше, антипод

**АНТИРЕЛИГИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое дингә ҡаршы; **антирелигио́зная пропага́нда** дингә ҡаршы пропаганда

**АНТИСАНИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое санитария талаптарына тап килмәгән, санитарияға ҡаршы; **антисанита́рные усло́вия** санитария талаптарына тап килмәгән шарттар

**АНТИСЕМИ́Т** *м* и **АНТИСЕМИ́ТКА** *ж* антисемит (*йәһүдтәрҙе дошман күреүсе*)

**АНТИСЕМИТИ́ЗМ** *м* антисемитизм (*синфи һәм сәйәси маҡсаттан сығып, йәһүдтәргә ҡаршы тоҡандырылған күрә алмаусанлыҡ*)

**АНТИСЕМИ́ТСКИЙ,** -ая, -ое йәһүдтәргә ҡаршы кешеләргә, антисемиттарға хас; **антисеми́тские настрое́ния** антисемиттарға хас ҡылыҡ (кәйеф)

**АНТИСЕ́ПТИКА** *ж*; *мед.* антисептика (**1.** *микробтарҙы үлтерә торған химик матдәләр ярҙамында йәрәхәтте таҙартыу һәм ағыуланыуҙан һаҡлау* **2.** *собир. йоғошһоҙландырыусы саралар, антисептиктар, дарыуҙар*)

**АНТИСЕПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* йоғошһоҙландырыусы, антисептик; **антисепти́ческие сре́дства** йоғошһоҙландырыусы дарыуҙар

**АНТИСОВЕТИ́ЗМ** *м* антисоветизм (*Советтар Союзына, уның ҡоролошона дошман идеология һәм сәйәсәт*)

**АНТИСОВЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое совет власына ҡаршы, советтарға ҡаршы; **антисове́тская пропага́нда** совет власына ҡаршы пропаганда

**АНТИТЕ́ЗА** *ж* **1.** *лит.* ҡаршы ҡуйып сағыштырыу, антитеза (*стилистик алым*) **2.** ҡапма-ҡаршылыҡ; **рассма́тривать как антите́зу** ҡапма-ҡаршылыҡ рәүешендә ҡарау

**АНТИТЕ́ЗИС** *м*; *филос., лог.* антитезис (*тезистағы фекергә ҡаршы фекер*)

**АНТИТЕЛА́** *мн.*; *биол., хим.* антиматдәләр (*организмға сит аҡһымдар, бактериялар, уларҙың ағыуын һ.б. индергәндә, унда барлыҡҡа килгән матдәләр*)

**АНТИТОКСИ́НЫ** *мн.* (*ед.* **антитокси́н** *м*); *мед.* антитоксиндар (*токсин тәьҫирендә организм эшләп сығарған һәм шул токсиндарҙан организмды һаҡлай торған матдәләр*)

**АНТИТОКСИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое зарарһыҙландырыуға һәләтле, ағыуланыуҙан һаҡлаусы; **антитокси́ческая сы́воротка** ағыуланыуҙан һаҡлай торған сыворотка

**АНТИФАШИ́СТ** *м* антифашист, фашизмға ҡаршы кеше;

**АНТИФАШИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое фашизмға ҡаршы; **антифаши́стский комите́т молодёжи** йәштәрҙең фашизмға ҡаршы комитеты; **антифаши́стское движе́ние** фашизмға ҡаршы хәрәкәт

**АНТИФРИ́З** *м*; *спец.* антифриз (**1.** *һыуҙың туңыу температураһын кәметә торған матдә* **2.** *ошо матдәнең түбән температурала туңмай торған һыуҙағы иретмәһе*)

**АНТИ́ХРИСТ** *м* **1.** *рел.* антихрист, дәжжәл (*христиан динендә: Христостың ахыр заман алдынан һуңғы көрәш өсөн килергә тейеш булған төп дошманы*) **2.** *уст., прост.* хыянатсы, мөртәт (*христиандар мосолмандарға ҡарата*)

**АНТИЦИКЛО́Н** *м*; *метеор.* антициклон (*циклондар араһында урынлашҡан атмосфера баҫымы юғары өлкә*); **центр антицикло́на** антициклон үҙәге

**АНТИЦИПА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* **1.** алдан күреү (белеү) һәләте **2.** алдан килеү (*ваҡиға, күренештәргә ҡарата*)

**АНТИЦИПИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* алдан күреү (белеү)

**АНТИЧАСТИ́ЦЫ** *мн.* (*ед.* **античасти́ца** *ж*) ҡаршы өлөшсәләр

**АНТИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** антиклыҡ (*Боронғо Греция, Рим донъяһы һәм уның мәҙәниәте*) **2.** боронғо күркәмлек, һомғоллоҡ, матурлыҡ өлгөһө (*йөҙ, бит, буй-һынға ҡарата*)

**АНТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** антик, боронғо; **анти́чная филосо́фия** антик фәлсәфә; **анти́чное иску́сство** антик (боронғо) сәнғәт; **анти́чный мир** боронғо донъя; **анти́чный теа́тр** антик театр **2.** (*классически правильный, красивый*) боронғоса күркәм (*һомғол, матур*); **анти́чные черты́ лица́** боронғоса матур йөҙ

**АНТОЛО́ГИЯ** *ж*; *лит.* антология (*төрлө авторҙарҙың һайланма әҫәрҙәренән торған йыйынтыҡ*); **антоло́гия башки́рской поэ́зии** башҡорт поэзияһы антологияһы

**АНТО́НИМ** *м*; *лингв.* антоним (*ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр, мәҫ., "аҡ" — "ҡара", "төн" — "көн" һ.б.*); **слова́рь анто́нимов** антонимдар һүҙлеге

**АНТОНИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антонимлыҡ ...ы, ҡапма-ҡаршы; **антоними́ческие отноше́ния** антонимлыҡ мөнәсәбәттәре (ҡапма-ҡаршылыҡ)

**АНТОНИМИ́ЧНОСТЬ** *ж* антонимлыҡ; **антоними́чность слов** һүҙҙәрҙең антонимлығы

**АНТО́НОВ: анто́нов ого́нь** *прост.* ҡан ағыуланыуы, гангрена

**АНТО́НОВКА** *ж* антоновка (*алма сорты*)

**АНТО́НОВСКИЙ: анто́новские я́блоки** *см.* **анто́новка**

**АНТРА́КТ** *м* антракт (**1.** *спектакль, концерт өлөштәре араһында яһалған тәнәфес* **2.** *тукталыш, өҙөк* **3.** *муз. опера йәки драма спектаклдәре өлөштәре араһында башҡарылған музыка әҫәре*)

**АНТРАЦИ́Т** *м*; *мин.* антрацит (*иң яҡшы таш күмер*)

**АНТРАЦИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое антрацит ...ы; **антраци́тные за́лежи** антрацит ятҡылыҡтары; **антраци́тные пласты́** антрацит ҡатламдары

**АНТРАЦИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **антраци́тный**

**АНТРАША́** *с*; *нескл.* антраша (*балетта бейеүсенең һикергәндә аяҡтары бер-береһенә тиҙ-тиҙ генә тейеп алған күренеш*) ♦ **выки́дывать (выде́лывать) антраша́** аяҡтар менән хикмәтле хәрәкәттәр яһау

**АНТРЕКО́Т** *м*; *кул.* антрекот (**1.** *һыйырҙың ҡабырға ите* **2.** *шул иттән ҡыҙҙырылған ашамлыҡ* **3.** *һыйыр ите котлеты*)

**АНТРЕПРЕНЁР** *м*; *театр.* антрепренёр (*шәхси театр тотҡан кеше*)

**АНТРЕПРИ́ЗА** *ж* антреприза (*шәхси театр*)

**АНТРЕСО́ЛИ** *мн.* (*ед.* **антресо́ль** *ж*) антресоль (**1.** *өйҙөң өҫкө тәпәш ҡаты* **2.** *бейек бүлмәләге галерея формаһындағы рәшәткәле ярым ҡат*)

**АНТРОПО́ЛОГ** *м* антрополог, антропология белгесе

**АНТРОПОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** антропологик; **антропологи́ческие да́нные** антропологик мәғлүмәттәр; **антропологи́ческие рабо́ты** антропологик эштәр; **антропологи́ческий при́знак** антропологик билге; **антропологи́ческий при́нцип** антропологик принцип **2.** антропология ...ы; **антропологи́ческий музе́й** антропология музейы

**АНТРОПОЛО́ГИЯ** *ж* антропология (*кешенең биологик тәбиғәтен өйрәнгән фән*); **кабине́т антрополо́гии** антропология кабинеты; **музе́й антрополо́гии** антропология музейы

**АНТРОПОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антропометрик; **антропометри́ческие да́нные** антропометрик мәғлүмәттәр

**АНТРОПОМЕ́ТРИЯ** *ж* антропометрия (*антропологик тикшеренеүҙәрҙең кеше тәнен һәм уның өлөштәрен үлсәү менән шөғөлләнгән бер алымы*)

**АНТРОПОМОРФИ́ЗМ** *м* антропоморфизм, кәүҙәләнеш (**1.** *кешегә хас психик үҙенсәлектәрҙе тәбиғәт күренештәренә, үҫемлектәргә һәм айырым нәмәләргә күсереп йәнләндереү* **2.** *алланы кеше сүрәтендә күҙ алдына килтергән күп диндәргә хас ҡараш*)

**АНТРОПОМОРФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое антропоморфик; **антропоморфи́ческое мировоззре́ние** донъяға антропоморфик ҡараш

**АНТРОПОМО́РФНЫЙ,** -ая, -ое кешегә оҡшаш, антропоморф; **антропомо́рфные обезья́ны** кешегә оҡшаш (антропоморф) маймылдар

**АНТРОПОФА́Г** *м*; *книжн.* кеше ашаусы кеше

**АНТРОПОФА́ГИЯ** *ж*; *книжн.* кеше ашау ғәҙәте

**АНТУРА́Ж** *м* әйләнә-тирәләге хәл, тормош шарттары, уратылышы; **созда́ть необходи́мый антура́ж** әйләнә-тирәлә тейешле шарттар булдырыу

**А́НТЫ** *мн.* ант халҡы (*Днестр менән Днепр араһында IV—VI бб. йәшәгән көнсығыш славян ҡәбиләләренең атамаһы*)

**АНФА́С** *нареч.* йөҙ менән алға ҡарап; **сфотографи́роваться анфа́с** фотоға йөҙ менән алға ҡарап төшөү

**АНФИЛА́ДА** *ж* анфилада (*береһенән икенсеһенә тураға үтеп йөрөмәле итеп эшләнгән бүлмәләр теҙеме*)

**АНЧА́Р** *м* анчар (*һуты һөт һымаҡ, үҙе ағыулы тропик үҫемлек*)

**АНШЛА́Г** *м*; *театр.* аншлаг (*театр, кинолар*ҙа *һ.б. билеттарҙың һатып бөтөрөлөүе хаҡындағы иғлан*); **вы́весить аншла́г** аншлаг элеү ♦ **пройти́ с аншла́гом** ҙур уңыш менән барыу (*театр һ.б. тамашалар хаҡында*)

**АНЮ́ТИН: аню́тины гла́зки** *бот.* ала миләүшә

**АО́РИСТ** *м*; *лингв.* аорист (*грек, иҫке славян һәм ҡайһы бер башҡа телдәрҙә ҡылымдың үткән заман формаларының береһе*)

**АО́РТА** *ж*; *анат.* аорта (*тәндең үпкәнән башҡа бөтә ағзаларына артерия ҡаныны таратҡан, йөрәктең һул муҡсаһынан сыҡҡан иң йыуан артерия*); **дуга́ ао́рты** аорта дуғаһы

**АПАРТАМЕ́НТЫ** и **АПАРТА́МЕНТЫ** *мн.* (*ед.* **апартаме́нт** и **апарта́мент** *м*) апартаменттар (*бай йыһазлы өй, бүлмә*)

**АПАТИ́Т** *м*; *мин.* апатит; **за́лежи апати́тов** апатит ятҡылығы

**АПАТИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое апатит ...ы; **апати́товая руда́** апатит мәғдәне; **апати́товое месторожде́ние** апатит ятҡылығы

**АПАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** төшөнкө; **апати́ческое состоя́ние** төшөнкө хәл **2.** дәртһеҙ, һүлпән; **апати́ческий взгляд** дәртһеҙ ҡараш, һүлпән ҡараш

**АПАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** төшөнкөлөк; **апати́чность настрое́ния** күңел төшөнкөлөгө **2.** дәртһеҙлек, һүлпәнлек; **апати́чность движе́ния** дәртһеҙ (һүлпән) хәрәкәт (*хәрәкәт һүлпәнлеге*)

**АПАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **апати́ческий** **2.** (*равнодушный*) һалҡын, вайымһыҙ

**АПА́ТИЯ** *ж* **1.** апатия, төшөнкө, төшөнкөлөк; **впасть в апа́тию** төшөнкөлөккә бирелеү; **вы́звать апа́тию** апатия тыуҙырыу **2.** дәртһеҙ, һүлпән хәл

**АПЕЛЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *юр.* апелляция биреү, шикәйәт яҙыу; **2.** *к кому-чему* кәңәш, ярҙам йәки яҡлау һорап мөрәжәғәт итеү (*мәҫ.,*

*халыкҡа*); **апелли́ровать к ма́ссам** халыкҡа ярҙам һорап мөрәжәғәт итеү; **апелли́ровать к обще́ственному мне́нию** ярҙам һорап, халыҡ фекеренә мөрәжәғәт итеү

**АПЕЛЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое апелляция ...ы; **апелляцио́нная жа́лоба** апелляция ялыуы; **апелляцио́нный суд** апелляция суды; **апелляцио́нный срок** апелляция срогы

**АПЕЛЛЯ́ЦИЯ** *ж* **1.** *юр.* (*обжалование*) апелляция; **пода́ть апелля́цию на реше́ние суда́** суд ҡарарына апелляция биреү **2.** *к кому-чему* (*обращение за поддержкой*) мөрәжәғәт итеү (кәңәш, ярҙам һорап)

**АПЕЛЬСИ́Н** *м* әфлисун (*ағасы һәм емеше*)

**АПЕЛЬСИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** әфлисун ...ы; **апельси́нное варе́нье** әфлисун ҡайнатмаһы **2.** әфлисун ...ы; **апельси́нное де́рево** әфлисун ағасы; **апельси́нные до́льки** әфлисун бүлкәләре

**АПЕЛЬСИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **апельси́нный**

**АПЛОДИ́РОВАТЬ** *несов.* ҡул сабыу, алҡышлау, хуплау; **аплоди́ровать певцу́** йырсыны алҡышлау

**АПЛОДИСМЕ́НТЫ** *только мн.* алҡыш, ҡул сабыу; **приве́тствовать гро́мом аплодисме́нтов** гөрләтеп ҡул сабып ҡотлау; **бу́рные аплодисме́нты** көслө алҡыштар

**АПЛО́МБ** *м* үҙ көсөңә (артыҡ) ышаныу, шапырыныу; **говори́ть с апло́мбом** артыҡ шапырынып һөйләү

**АПОГЕ́Й** *м* **1.** *астр.* апогей (*Ай орбитаһының Ергә иң алыҫ өлөшө*) **2.** *перен.* юғары нөктә, кимәл, дәрәжә; **в апоге́е сла́вы** дандың юғары нөктәһе; **дости́чь своего́ апоге́я** үҙеңдең иң юғары дәрәжәңә ирешеү

**АПОКА́ЛИПСИС** *м* Апокалипсис (*Инжилдың ахыры заман тураһында күрәҙәлек иткән китабы*)

**АПОКРИФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лит.* апокрифик; **апокрифи́ческая литерату́ра** апокрифик әҙәбиәт

**АПО́КРИФЫ** *мн.* (*ед.* **апо́криф** *м*); *лит.* апокриф (*рәсми дини тәғлимәттән айырылған, шунлыктан сиркәү кире ҡаҡҡан боронғо библия сюжетлы әҫәрҙәр*)

**АПОЛИТИ́ЗМ** *м см.* **аполити́чность**

**АПОЛИТИ́ЧНОСТЬ** *ж* сәйәси тормоштан ситләшеү, сәйәсәткә битараф булыу

**АПОЛИТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое сәйәсәттән ситтә торған (уға ҡатнашмаған); **аполити́чная литерату́ра** сәйәсәттән ситтә торған әҙәбиәт; **аполити́чный челове́к** сәйәсәткә ҡатнашмаған кеше

**АПОЛО́Г** *м*; *лит.* аполог (*хайуандар тормошон һүрәтләп, асыктан-асыҡ әҙәплелеккә өйрәткән, мәсәлдәрҙе башлап ебәргән ҡыҫҡа ғына кинәйәле хикәйәләү*)

**АПОЛОГЕ́Т** *м* апологет (*ниндәйҙер фекерҙе, тәғлимәтте һ.б. яҡлаған, аҡлаған йәки маҡтаған кеше*); **апологе́ты капитали́зма** капитализм апологеттары; **апологе́ты рели́гии** дин апологеттары

**АПОЛОГЕ́ТИКА** *ж* **1.** апологетика (*христиан дине ҡанундарын яҡлаусы дини тәғлимәт тармағы*) **2.** *перен.* урынһыҙ маҡтау (яҡлау)

**АПОЛОГЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** апологетик **2.** *перен.* маҡтауға (яҡлауға) ҡоролған

**АПОЛО́ГИЯ** *ж*; *книжн.* маҡтау, яҡлау, аҡлау (*телдән йәки яҙып*)

**АПОПЛЕ́КСИЯ** и **АПОПЛЕКСИ́Я** *ж*; *мед.* апоплексия (*мейегә ҡан һауыу йәки мейе тамырына ҡан тығылыуҙан килгән ауырыу*) мейе фалижы, инсульт

**АПО́РТ** *м* апорт (*эре алма сорты*)

**АПОСТЕРИО́РИ** *нареч.*; *филос.*, *лог.* апостериори, тәжрибә, мәғлүмәттәр нигеҙендә

**АПОСТЕРИО́РНЫЙ,** -ая, -ое *филос.*, *лог.* апостериор, мәғлүмәттәргә нигеҙләнгән; **апостерио́рное сужде́ние** апостериор фекерләү

**АПО́СТОЛ** *м* **1.** *рел.* апостол (*Инжил китабында Христостың үҙ тәғлимәтен таратыу өсөн ебәргән ун ике шәкертенең һәр береһе*) **2.** *чего*; *перен.*, *книжн.* идеяны (тәғлимәтте) ихлас тотоусы һәм таратыусы; **апо́стол незави́симости** бойондороҡһоҙлоҡ идеяһын ихлас таратыусы (ышаныусы) **3.** (*церковная книга об апостолах, напр.*, “*Деяния святых апостолов*”) Апостол

**АПО́СТОЛЬСКИЙ,** -ая, -ое апостолдар ...ы; **апо́стольские дея́ния** апостолдар эше

**АПОСТРО́Ф** *м* апостроф (*хәреф өҫтөнә өтөр һымаҡ итеп ҡуйылған билдә*); **знак апостро́фа** апостроф билдәһе; **поста́вить апостро́ф** апостроф ҡуйыу

**АПОФЕО́З** *м* апофеоз (**1.** *Боронғо Римда, Грецияла батырҙы, императорҙы һ.б. аллалаштырыу йолаһы* **2.** *ниндәйҙер кешене, күренеште, ваҡиғаны маҡтау, ололау ғәҙәте* **3.** *театр. сәхнәлә халыкты, батырҙарҙы, ижтимағи ваҡиғаларҙы һ.б. данлаусы тантаналы һуңғы тамаша*)

**АППАРА́Т** *м* **1.** *тех.* аппарат (*билдәле бер эш башҡарған механик ҡорал*); **телефо́нный аппара́т** телефон аппараты; **фотографи́ческий аппара́т** фотография аппараты **2.** *физиол.* аппарат (*организмда билдәле бер функция башҡарған ағзалар*); **дыха́тельный аппара́т** һулыш аппараты **3.** аппарат (*идаралыктың йәки хужалыктың бер тармағын хеҙмәтләндергән ойошма һәм унда эшләүселәр*); **госуда́рственный аппара́т** дәүләт аппараты; **торго́вый аппара́т** сауҙа аппараты ♦ **нау́чный аппара́т** ғилми аппарат (*ғилми эштең авторы файҙаланған материалдар, төрлө әсбаптар, күрһәткестәр, һүҙлектәр, аңлатмалар, библиография һ.б.*); **крити́ческий аппара́т** тәнҡит аппараты (*әҙәби йәки*

*тарихи текстың ғилми баҫмалағы төрҙәре һәм иҫкәрмәләре)*

**АППАРА́ТНАЯ** *ж* аппарат бүлмәһе

**АППАРАТУ́РА** *ж собир.*; *тех.* **1.** ҡорал-ҡорамал, төрлө-төрлө аппарат; **киносъёмочная аппарату́ра** кино төшөрөү аппараттары; **хими́ческая аппарату́ра** химик аппараттар; **заво́д низково́льтной электри́ческой аппарату́ры** түбән вольтлы электр аппараттары заводы **2.** (*оборудование*) йыһаз, ҡорамал; **лаборато́рная аппарату́ра** лаборатория йыһазы; **цехова́я аппарату́ра** цех йыһазы (цех ҡорамалы)

**АППАРА́ТЧИК** *м* и **АППАРА́ТЧИЦА** *ж* аппаратсы; **рабо́тать аппара́тчиком** аппаратсы булып эшләү

**АППЕ́НДИКС** *м* **1.** *анат.* һуҡыр эсәк үсентеһе; **вы́резать аппе́ндикс** һуҡыр эсәк үсентеһен алып ташлау **2.** *тех.* аппендикс (*һауа шары ҡабының аҫҡы өлөшөндә газ һурыу һәм сығарыу өсөн ҡуйылған ҡыҫҡа шланг йәки торба*)

**АППЕНДИЦИ́Т** *м*; *мед.* аппендицит (*һуҡыр эсәктең тулышып шешеүе*)

**АППЕРЦЕ́ПЦИЯ** *ж*; *псих.* апперцепция (*үҙләштереүҙең алынған тәжрибәгә, элекке белемгә, белем байлығына бәйле булыуы*)

**АППЕРЦИПИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *псих.* апперцепциялау; булған тәжрибә нигеҙендә үҙләштереү

**АППЕРЦИПИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **апперципи́ровать**

**АППЕТИ́Т** *м* **1.** аппетит, ашағы килеү; **хоро́ший аппети́т** яҡшы аппетит; **возбужде́ние аппети́та** аппетитты ҡуҙғытыу; **наруше́ние аппети́та** аппетит боҙолоу; **нормализа́ция аппети́та** аппетиттың нормалашыуы; **поте́ря аппети́та** аппетитты юғалтыу; **есть с аппети́том** аппетит менән ашау **2.** *перен.* нәфсе, талым; **аппети́т к деньга́м** аҡсаға нәфсе тыуыу ♦ **во́лчий аппети́т** көслө аппетит, бик ныҡ ашағы килеү; **прия́тного аппети́та** ашың тәмле булһын; **испо́ртить аппети́т**: 1) аштың тәмен ебәреү; 2) эштән күңел ҡайтыу

**АППЕТИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*вкусный*) аппетитлы, тәмле, ымһындырғыс; **аппети́тная колбаса́** тәмле тултырма; **аппети́тная пи́ща** ымһындырғыс аш **2.** *перен., прост.* (*привлекательный, соблазнительный*) һөйкөмлө, яғымлы, мөләйем (*ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ*)

**АППЛИКА́ЦИЯ** *ж* аппликация, ҡорама һымаҡ ҡорау (**1.** *төрлө төҫтәге тауар, ҡағыҙ киҫәктәрен нимәгәлер йәбештереү йәки тегеү юлы менән һүрәт төшөрөү* **2.** *шул юл менән эшләнгән һүрәт*)

**АППРЕТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аппрети́ровать**

**АППРЕТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* матурлау, биҙәкләү (*туҡыма, тире һ.б. эшкәрткәндән һуң*)

**АППРЕТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аппрети́ровать**

**АППРЕТУ́РА** *ж*; *тех.* аппретура (*биҙәү өсөн туҡыманы, тирене махсус матдә менән эшкәртеү*)

**АПРЕ́ЛЬ** *м* апрель (*календарь йылының дүртенсе айы*); **коне́ц апре́ля** апрель аҙағы

**АПРЕ́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое апрель …ы; **апре́льское у́тро** апрель иртәһе

**АПРИО́РИ** *нареч.* **1.** *филос., лог.* априори, тәжрибәнән тыш (башҡа) **2.** *перен., книжн.* алдан ҡарамайынса, тикшермәйенсә, өҫтән-мөҫтән

**АПРИОРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **априо́рный**

**АПРИО́РНОСТЬ** *ж*; *филос., лог.* априорлыҡ, априор булыу; **априо́рность утвержде́ния** раҫлауҙың априор булыуы

**АПРИО́РНЫЙ,** -ая, -ое *филос., лог.* априор, өҫтән-мөҫтән, тикшереп тормай, тәжрибәгә нигеҙләнмәгән, таянмаған; **априо́рное утвержде́ние** тикшереп тормай раҫлау, априор раҫлау

**АПРОБА́ЦИЯ** *ж* апробация (**1.** *кит. һынау, тикшереү нигеҙендә сығарылған рәсми хуплау* **2.** *а.-х. яҡшыларын орлоҡҡа айырып алыу өсөн ауыл хужалығы баҫыуының сорт сифатын баһалау*); **провести́ апроба́цию** апробация үткәреү

**АПРОБИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** *книжн.* апробация биреү, рәсми хуплау **2.** *с.-х.* апробация үткәреү; **апроби́ровать посе́вы сельскохозя́йственных культу́р** ауыл хужалығы культураларын сәсеүлектәренә апробация үткәреү

**АПРОБИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **апроби́ровать**

**АПТЕ́КА** *ж* аптека, дарыухана; **идти́ в апте́ку** аптекаға (дарыуханаға) барыу ♦ **как в апте́ке** *шутл.* теп-теүәл, аныҡ

**АПТЕ́КАРСКИЙ,** -ая, -ое **1.** аптека …ы; **апте́карские весы́** аптека үлсәүе; **апте́карский склад** аптека (дарыухана) склады **2.** аптекасы (дарыуханасы) …ы; **апте́карский помо́щник** аптекасы ярҙамсыһы

**АПТЕ́КАРША** *ж*; *прост.* **1.** (*женщина-аптекарь*) аптекасы, дарыуханасы ҡатын-ҡыҙ **2.** (*жена аптекаря*) аптекасы (дарыуханасы) ҡатыны

**АПТЕ́КАРЬ** *м* **1.** *уст., прост.* аптекасы (дарыуханасы), аптекала (дарыуханала) дарыу яһаусы; фармацевт **2.** *уст.* аптека хужаһы

**АПТЕ́ЧКА** *ж* аптечка; **ли́чная апте́чка** шәхси аптечка; **доро́жная апте́чка** юл аптечкаһы; **дома́шняя апте́чка** өй аптечкаһы

**АПТЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое аптека …ы; **апте́чное управле́ние** аптекалар (дарыуханалар) идаралығы; **апте́чный склад** аптекалар склады; **апте́чный шкаф** аптека шкафы

**АР** *м* ар (*гектарҙың йөҙҙән бер өлөшөнә йәки йөҙ кв. метрға тиң ер үлсәүе*); **уча́сток земли́ в оди́н ар** бер ар ер

**АРАБЕ́СКИ** *мн.* (*ед.* **арабе́ск** *м* и **арабе́ска** *ж*) арабеска (**1.** *геометрик фигураларҙан, стилләштерелгән япраҡтар һәм сәскәләрҙән торған, башта тик ғәрәп ҡомартҡыларында осраған ҡатмарлы орнамент* **2.** *классик бейеүҙә балет позаһы* **3.** *нәфис мелодик һүрәтләнешле инструменталь пьеса жанры*)

**АРАБИ́ЗМ** *м* ғәрәпсә, ғәрәпкә мөнәсәбәтле

**АРАБИ́СТ** *м* ғәрәп теле (мәҙәниәте) белгесе (ғалимы)

**АРАБИ́СТИКА** *ж* ғәрәп фәне (*ғәрәп телен, яҙмаһын, мәҙәниәтен һәм тарихын өйрәнгән фән*)

**АРА́БСКИЙ,** -ая, -ое ғәрәп …ы; **ара́бский язы́к** ғәрәп теле; **ара́бское иску́сство** ғәрәп сәнғәте ♦ **ара́бская ло́шадь** ғәрәп аты (*яҡшы тоҡомло менге ат*); **ара́бские ци́фры** ғәрәп һандары; **ара́бские бу́квы** ғәрәп хәрефтәре

**АРА́БЫ** *мн.* ғәрәптәр, ғәрәп халҡы // *ед.* **ара́б** *м* ғәрәп ир-аты; **ара́бка** *ж* ғәрәп ҡатын-ҡыҙы

**АРАКЧЕ́ЕВСКИЙ,** -ая, -ое Аракчеев …ы; **аракче́евский режи́м** Аракчеев режимы; **аракче́евские нра́вы** Аракчеев урынлаштырған тәртип

**АРАКЧЕ́ЕВЩИНА** *ж* аракчеевсылыҡ (**1.** *Рәсәйҙә XIX б. башында урынлашҡан сикләнмәгән полиция режимы, хәрбиҙәр башбаштаҡлығы һәм халыҡты көсләү режимы* **2.** *күсм. ниндәйҙер ижтимағи өлкәлә бәләкәй генә бер төркөм халыҡтың башбаштаҡ рәүештә, үҙ белдеге менән хужа булыу хәле*)

**АРА́ЛИЯ** *ж* аралия (*эре япраҡлы, һепертке һымаҡ йыйнаҡ сәскәле ҡыуаҡ*)

**АРАНЖИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; муз.* аранжировкалау; **аранжи́ровать пе́сню для фортепья́но** йырҙы фортепьяно өсөн аранжировкалау

**АРАНЖИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аранжи́ровать**

**АРАНЖИРО́ВКА** *ж; муз.* аранжировка (*бер төрлө ҡоралға йәки тауышҡа яҙылған музыка әҫәрен икенсе төрлө ҡоралға ярашлы итеп һалыу эше*)

**АРА́П I** *м; уст.* негр; **ара́пка** *ж; уст.* негр ҡатын-ҡыҙы

**АРА́П II** *м; прост.* алдаҡсы, йылмаяҡ

**АРА́ПНИК** *м* ҡайыш ҡамсы (*һунар эте өсөн*)

**АРА́Т** *м* арат (*Монголия Халыҡ Республикаһында һәм Тыва Республикаһында малсылыҡ менән көн итеүсе*)

**АРА́ТСКИЙ,** -ая, -ое арат …ы; **ара́тское хозя́йство** арат хужалығы

**АРА́ХИС** *м* арахис, ҡытай сәтләүеге (*май үҫемлеге һәм уның емеше*); **ара́хис культу́рный** культуралы ҡытай сәтләүеге; **ара́хис обыкнове́нный** ябай ҡытай сәтләүеге; **ара́хис азиа́тский** Азия (ҡытай) сәтләүеге

**АРА́ХИСОВЫЙ,** -ая, -ое ҡытай сәтләүегенән эшләнгән; ҡытай сәтләүеге …ы; **ара́хисовое ма́сло** ҡытай сәтләүеге майы; **ара́хисовая халва́** ҡытай сәтләүеге хәлүәһе

**АРБАЛЕ́Т** *м* арбалет (*камиллаштырылған уҡ; атыу ҡоралы*)

**АРБИ́ТР** *м; юр.* арбитр (*суд ҡарамағында булмаған бәхәстәрҙе, ярыштарҙы хөкөм иткән белгес, судья*); **госуда́рственный арби́тр** дәүләт арбитры; **арби́тр соревнова́ний** ярыш арбитры

**АРБИТРА́Ж** *м; юр.* арбитраж (*арбитр хәл иткән мәсьәлә, эш*) ♦ **ве́домственный арбитра́ж** ведомство арбитражы; **внешнеторго́вый арбитра́ж** тышҡы сауҙа арбитражы; **госуда́рственный арбитра́ж** дәүләт арбитражы; **междунаро́дный арбитра́ж** халыҡ-ара арбитраж

**АРБИТРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое арбитраж …ы; **арбитра́жная коми́ссия** арбитраж комиссияһы

**АРБУ́З** *м* ҡарбуз; **есть арбу́з** ҡарбуз ашау; **посади́ть арбу́з** ҡарбуз сәсеү (ултыртыу)

**АРБУ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡарбуз …ы; **арбу́зная ко́рка** ҡарбуз ҡабығы; **арбу́зные семена́** ҡарбуз орлоғо **2.** ҡарбуздан эшләнгән, ҡарбуз …ы; **арбу́зное вино́** ҡарбуздан эшләнгән шарап; **арбу́зный мёд** ҡарбуздан эшләнгән бал, ҡарбуз балы

**АРГЕНТИ́НСКИЙ,** -ая, -ое аргентин …ы, Аргентина …ы; **аргенти́нский наро́д** Аргентина халҡы; **аргенти́нский диале́кт испа́нского языка́** испан теленең аргентин диалекты

**АРГЕНТИ́НЦЫ** *мн.* аргентин халҡы, аргентиндар // *ед.* **аргенти́нец** *м* аргентин ир-аты; **аргенти́нка** *ж* аргентин ҡатын-ҡыҙы

**АРГО́** *с нескл.; лингв.* арго, шартлы тел (*айырым бер төркөм, профессия кешеләре өсөн генә хас булған һөйләшеү теле*); **воровско́е арго́** бурҙар аргоһы (теле)

**АРГО́Н** *м* аргон (*химик элемент; һауа составына ингән еҫһеҙ, төҫһөҙ газ; электр лампаларын тултырыу өсөн һәм яҡтыртҡыс реклама приборҙарында ҡулланыла*); **арго́н атмосфе́рный** атмосфера аргоны; **арго́н промы́шленный** сәнәғәт аргоны

**АРГО́НОВЫЙ,** -ая, -ое аргон …ы

**АРГОТИ́ЗМ** *м; лингв.* арготизм (*ниндәйҙер аргонан әҙәби телгә алынған һүҙ*)

**АРГОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое арго …ы, арготизм …ы

**АРГУМЕ́НТ** *м* **1.** дәлил, нигеҙ, фекер; **логи́ческий аргуме́нт** логик фекер; **находи́ть аргуме́нты** дәлил табыу **2.** *мат.* аргумент; **аргуме́нт компле́ксного числа́** йыйылма һандар аргументы

**АРГУМЕНТА́ЦИЯ** *ж см.* **аргументи́ровать**

**АРГУМЕНТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **аргументи́ровать**

**АРГУМЕНТИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **аргументи́ровать** **2.** *прил.* нигеҙле, дәлилле; **аргументи́рованный отве́т** нигеҙле яуап; **аргументи́рованное доказа́тельство** дәлилле иҫбатлау

**АРГУМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* дәлилдәр килтереү, дәлилләү, нигеҙләү

**АРГУМЕНТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аргументи́ровать**

**АРЕА́Л** *м*; *зоол.*, *бот.* ареал, таралыу өлкәһе; **ареа́л европео́идной ра́сы** европеоид раса таралған урын (өлкә); **сплошно́й ареа́л** тотош таралған өлкә; **ка́рта ареа́лов** ареалдар картаһы

**АРЕА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ареал ...ы; **ареа́льная ка́рта** ареалдар картаһы ♦ **ареа́льная лингви́стика** билдәле бер өлкә (урын) лингвистикаһы, тел ғилеме

**А́РЕДОВ: а́редовы ве́ки жить** оҙон-оҙаҡ йәшәү, оҙон ғүмер һөрөү

**АРЕ́НА** *ж* **1.** майҙан, арена; **циркова́я аре́на** цирк майҙаны; **спорти́вная аре́на** спорт аренаһы; **2.** урын; **аре́на борьбы́** көрәш урыны **3.** *перен.* арена, даирә, эш өлкәһе; **мирова́я аре́на** донъя аренаһы; **полити́ческая аре́на** сәйәси даирә

**АРЕ́НДА** *ж* ҡуртым, аренда; **аре́нда земли́** ер ҡуртымы; **брать (получа́ть) в аре́нду** ҡуртымға алыу; **отдава́ть в аре́нду** ҡуртымға биреү

**АРЕНДА́ТОР** *м* ҡуртымсы, арендалаусы

**АРЕНДА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое ҡуртымсы ...ы, арендасы ...ы; **арендáторское пра́во** ҡуртымсы (арендасы) хоҡуғы

**АРЕ́НДНЫЙ,** -ая, -ое ҡуртым ...ы, аренда ...ы; **аре́ндная пла́та** ҡуртым түләүе; **аре́ндная цена́** ҡуртым хаҡы; **аре́ндный догово́р** аренда килешеүе

**АРЕНДОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что* ҡуртымлау, арендалау; **арендова́ть зе́млю** ерҙе ҡуртымлау; **арендова́ть стадио́н** стадионды ҡуртымлау

**АРЕНДОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **арендова́ть**

**АРЕО́МЕТР** *м*; *физ.* ареометр (*шыйыҡ матдәнең ҡуйылығын билдәләй торған ҡорамал*)

**АРЕ́СТ** *м* **1.** арест, ҡулға алыу; **реше́ние об аре́сте** ҡулға алыу тураһындағы ҡарар; **дисципли́нарный аре́ст** холоҡ төҙәтеү өсөн ҡулға алыу; **взять под аре́ст** ҡулға алыу; **держа́ть под аре́стом** һаҡ аҫтында тотоу **2.** арест, тыйыу; **аре́ст иму́щества** мөлкәттән файҙаланыуҙы тыйыу; **наложи́ть аре́ст** арест һалыу

**АРЕСТА́НТ** *м* и **АРЕСТА́НТКА** *ж* ; *уст.* арестант, ҡулға алынған кеше, тотҡон

**АРЕСТА́НТСКИЙ,** -ая, -ое *уст.* **1.** тотҡондар ..ы, ҡулға алынғандар ...ы; **аре́ста́нтские ка́меры** тотҡондар камераһы; **аре́ста́нтский хала́т** тотҡондар халаты **2.** *в знач. сущ.* **аре́ста́нтская** *ж* тотҡондар бүлмәһе

**АРЕСТО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡулға алынған; **аресто́ванный челове́к** ҡулға алынған кеше **2.** *в знач. сущ.* **аресто́ванный** *м* и **аресто́ванная** *ж* ҡулға алынған кеше, тотҡон

**АРЕСТОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** ҡулға алыу, тотҡон итеү **2.** тыйыу, тартып алыу; **арестова́ть иму́щество** мөлкәтте тартып алыу (*мөлкәттән файҙаланыуҙы тыйыу*)

**АРЕСТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **арестова́ть**

**АРЕСТО́ВЫВАТЬ** *несов. от* **арестова́ть**

**АРЕСТО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **аресто́вывать**

**АРИ́ЙЦЫ** *мн.*; *уст.* арийҙар, арий халҡы // *ед.* **ари́ец** *м* арий ир-аты; **ари́йка** *ж* арий ҡатын-ҡыҙы

**АРИО́ЗО** *с нескл.*; *муз.* ариозо (*көйләп һөйләүгә ҡоролған иректе ҡыҫҡа ария*); ** арио́зо Ле́нского из о́перы "Евге́ний Оне́гин"** "Евгений Онегин" операһынан Ленский ариозоһы

**АРИСТОКРА́Т** *м* и **АРИСТОКРА́ТКА** *ж* аристократ, аҡһөйәк

**АРИСТОКРАТИ́ЗМ** *м* аристократизм; **порази́ть аристократи́змом** аристократизмы менән һоҡландырыу

**АРИСТОКРАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** аристократтар, аристократия ...ы; **аристократи́ческое о́бщество** аристократия йәмғиәте, аристократтар йәмғиәте; **аристократи́ческие сало́ны** аристократтар салоны **2.** (*изысканный*, *утончённый*) аристократтарға хас, аристократик; **аристократи́ческие привы́чки** аристократик ғәҙәттәр **3.** (*принадлежащий к аристократии*) аристократияға ҡараған; **аристократи́ческая просло́йка** аристократияға ҡараған ҡатлам (аристократия ҡатламы); **аристократи́ческая семья́** аристократия ғаиләһе

**АРИСТОКРАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* аристократлыҡ

**АРИСТОКРАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (*изысканный*, *утончённый*) аристократтарға хас, аристократик; **аристократи́чный подхо́д** аристократик мөнәсәбәт

**АРИСТОКРА́ТИЯ** *ж* аристократия (**1.** *синфи йәмғиәттә юғары ҡатлам, хаким синыфтың өҫтөнлөклө ҡатламы, ырыу башлыҡтары* **2.** *синыфтың йәки ниндәйҙер ижтимағи төркөмдөң юғары ҡатламы* **3.** *тар. бер төркөм иң юғары ҡатлам кешеләре торған идара формаһы*)

**АРИТМИ́ЧНОСТЬ** *ж* ритмһыҙлыҡ

**АРИТМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ритмһыҙ, ритмы боҙолған

**АРИТМИ́Я** *ж*; *мед.* аритмия, ритм боҙолоуы; **аритми́я се́рдца** йөрәк аритмияһы; **дыха́тельная аритми́я** тын алыу ритмының боҙолоуы

**АРИФМЕ́ТИКА** *ж* арифметика, хисап; **теорети́ческая арифме́тика** теоретик арифметика; **уро́к арифме́тики** хисап дәресе; **учё́бник по арифме́тике** хисап дәреслеге

**АРИФМЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое арифметик; **арифмети́ческая прогре́ссия** арифметик прогрессия; **арифмети́ческая зада́ча** арифметик мәсьәлә; **арифмети́ческое вычисле́ние** арифметик юл менән иҫәпләү; **арифмети́ческое де́йствие** арифметик ғәмәл; **сре́днее арифмети́ческое** арифметик урта (дәүмәл)

**АРИФМО́ГРАФ** *м* арифмограф (*арифметик ғәмәлдәрҙе ябай юл менән башҡара торған автоматик яҙмалы иҫәп машинаһы*)

**АРИФМО́МЕТР** *м* арифмометр (*арифметик дүрт ғәмәлде механик юл менән башҡарыусы иҫәпләү машинкаһы*); **моде́ли арифмо́метра** арифмометр моделдәре

**А́РИЯ** *ж* ария; **а́рия Салава́та** Салауат арияһы; **разнови́дности а́рии** ария төрҙәре

**А́РКА** *ж*; *архит.* арка (**1.** *стеналағы уйымдың дуғаланып торған япмаһы йәки тауу араһы* **2.** *ҡапҡа аша үтмәле юл формаһында өҫтө көмбәҙләнеп бөткән декоратив ҡоролма*); **сде́лать а́рку** арка эшләү

**АРКА́ДА** *ж*; *архит.* аркада (*бер төр аркалар теҙмәһе*)

**АРКА́Н** *м* арҡан; **дли́нный арка́н** оҙон арҡан; **коро́ткий арка́н** ҡыҫҡа арҡан

**АРКА́НИТЬ** *несов. что* арҡанлау, арҡан менән тотоу, боғаллау, боғал менән тотоу

**А́РКТИКА** *ж* (*северная полярная область земного шара*) Арктика; **материко́вая А́рктика** материкка ҡараған Арктика; **геологи́ческое строе́ние А́рктики** Арктиканың геологик төҙөлөшө; **фа́уна и фло́ра А́рктики** Арктиканың фаунаһы һәм флораһы

**АРКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое арктик, Арктика …ы; **аркти́ческая ту́ндра** арктик тундра; **аркти́ческие льды** арктик боҙҙар; **аркти́ческий антицикло́н** Арктика антициклоны; **аркти́ческая фа́уна** Арктика фаунаһы; **аркти́ческие возду́шные ма́ссы** Арктика һауа массалары ♦ **Аркти́ческий бассе́йн** Арктик бассейн

**АРЛЕКИ́Н** *м*; *театр.* Арлекин (*Италияның "Битлектәр комедияһындағы" традицион персонаж — төрлө төҫтәге ҡорама костюм, ҡара ярым битлек кейгән, тапҡыр фекерле, ҡыйын хәлдәрҙән оҫта сыға белгән мәҙәк хеҙмәтсе*)

**АРЛЕКИНА́ДА** *ж* арлекинада (*төп ролде арлекин башҡарған пьеса*)

**АРМА́ДА** *ж* армада (*бер тәртиптә хәрәкәт иткән ҙур караптар, самолёттар йәки танкылар төркөмө*)

**АРМАТУ́РА** *ж* арматура (**1.** *тех. ниндәйҙер аппарат, машина, конструкция өсөн тәғәйенләнгән приборҙар, механизмдар* **2.** *эл. электр яҡтылығын булдырыу өсөн тәғәйенләнгән ҡорамалдар комплекты* **3.** *тех. тимер-бетон ҡоролманың, шулай уҡ ниндәйҙер материалдың, ҡоролманың ныҡлығын арттырыу өсөн индерелгән ҡорос һөлдә* **4.** *иҫк. төрлө хәрби ҡорал һ.б.* **5.** *сәнғ. төрлө хәрби ҡоралдарҙы кәүҙәләндергән һын йәки һүрәт*)

**АРМАТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое арматура …ы; **армату́рное желе́зо** арматура тимере; **армату́рные рабо́ты** арматура эштәре

**АРМАТУ́РЩИК** *м* арматурасы

**АРМЕ́ЕЦ** *м* армеец (*Рәсәйҙә хәрби хеҙмәткәр*)

**АРМЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое ғәскәри; **арме́йская слу́жба** хәрби хеҙмәт; **арме́йский полк** ғәскәри полк

**АРМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* арматуралау; **арми́ровать бето́н** бетон арматуралау

**АРМИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **арми́ровать**

**А́РМИЯ** *ж* **1.** ғәскәр, армия (*дәүләттең ҡоро ер, диңгеҙ, һауа ғәскәрҙәре*); **освободи́тельная а́рмия** азатлыҡ ғәскәре; **Росси́йская а́рмия** Рәсәй ғәскәрҙәре; **призыва́ть в а́рмию** ғәскәри хеҙмәткә саҡырыу, армияға алыу **2.** ҡоро ер ғәскәре (*хәрби-диңгеҙ һәм хәрби-һауа көстәренән айырмалы рәүештә*) **3.** (*соединение*) армия; **деса́нтная а́рмия** десант армияһы; **ко́нная а́рмия** атлы армия; **та́нковая а́рмия** танк армияһы **4.** *ист.* әрме; **перевести́ из гва́рдии в а́рмию** гвардиянан әрмегә күсерергә **5.** *кого-чего*; *перен.* (*множество людей*) армия; **а́рмия учителе́й** уҡытыусылар армияһы ♦ **де́йствующая а́рмия** *см.* **де́йствующий**

**АРМЯ́К** *м* сәкмән; **во́йлочный армя́к** тула сәкмән; **суко́нный армя́к** буҫтау сәкмән; **армя́к с галуна́ми** уҡалы сәкмән; **армя́к из сукна́ вы́сшего ка́чества** соға сәкмән; **армя́к из гру́бого просто́го сукна́** мәклә сәкмән

**АРМЯ́НЕ** *мн.* әрмәндәр, әрмән халҡы // *ед.* **армяни́н** *м* әрмән ир-аты; **армя́нка** *ж* әрмән ҡатын-ҡыҙ

**АРМЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое әрмән …ы, Армения…ы; **армя́нский язы́к** әрмән теле; **армя́нский наро́д** әрмән халҡы

**А́РНИКА** *ж* үгеҙ күҙе (*үлән*)

**АРОМА́Т** *м* **1.** хуш еҫ, тәмле еҫ; **придава́ть арома́т** хуш еҫ биреү **2.** *перен.* һулыш; **арома́т ю́ности** йәшлек һулышы; **арома́т и́скренности** сафлыҡ һулышы **3.** *уст.* аңҡып торған матдә

**АРОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **арома́тный** ♦ **аромати́ческие соедине́ния** хуш еҫле берләшмәләр

**АРОМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **арома́тный**; **аромати́чное вещество́** хуш еҫле матдә

**АРОМА́ТНЫЙ,** -ая, -ое хуш еҫле, тәмле еҫле; **арома́тные цветы́** хуш еҫле сәскәләр; **арома́тный чай** хуш еҫле сәй

**А́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое аркалы; **а́рочный мост** аркалы күпер

**АРПЕ́ДЖИО** *муз.* арпеджио (**1.** *түбәндән юғарыға сиратлап алынған тондарҙан төҙөлгән аккорд менән башҡарыу* **2.** *шул ысул менән башҡарылған аккордтың үҙе*)

**АРСЕНА́Л** *м* арсенал (**1.** *ҡорал һәм хәрби кәрәк-яраҡ келәте* **2.** *күсм. ниндәйҙер күп нәмә, һаҡ* **3.** *иҫк. ҡорал һәм хәрби кәрәк-яраҡ эшләгән, ремонтлаған урын*); **городско́й арсена́л** ҡала арсеналы; **экономи́ческий арсена́л** иҡтисади арсенал

**АРСЕНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое арсенал ...ы; **арсена́льный сто́рож** арсенал һаҡсыһы

**АРТА́ЧИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*о лошади*) сығынсылау, ҡарышыу; **ло́шадь арта́чится** ат сығынсылай **2.** (*о человеке*) *разг.* үҙһүҙләнеү, киреләнеү, тиҫкәреләнеү; **дово́льно тебе́ арта́читься** етер һиңә тиҫкәреләнергә

**АРТЕЗИА́НСКИЙ,** -ая, -ое артезиан ...ы; **артезиа́нская вода́** артезиан һыуы ♦ **артезиа́нский коло́дец** артезиан ҡоҙоғо (*бырауланған ерҙән һыуы бәреп сыҡҡан ҡоҙоҡ*)

**АРТЕ́ЛЬ** *ж* артель; **уста́в арте́ли** артель уставы; **хозя́йство арте́ли** артель хужалығы; **арте́ль инвали́дов** ғәриптәр артеле; **вступа́ть в арте́ль** артелгә инеү; **сельскохозя́йственная арте́ль** ауыл хужалығы артеле; **объединя́ться в арте́ль** артелләшеү

**АРТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** артель ...ы; **арте́льное хозя́йство** артель хужалығы; **арте́льный уста́в** артель уставы **2.** *прост.* дөйөм, күмәк, коллектив; **арте́льная рабо́та** күмәк эш **3.** *перен.*, *прост.* (*общительный*) ҡатнашып, аралашып барыусан; **арте́льный челове́к** аралашып барыусан кеше

**АРТЕ́ЛЬЩИК** *м*; *уст.* артелсе, артель ағзаһы

**АРТЕРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* **1.** артерия ...ы; **артериа́льная кровь** артерия ҡаны **2.** артериаль; **артериа́льное давле́ние** артериаль баҫым

**АРТЕРИОСКЛЕРО́З** *м*; *мед.* артериосклероз (*стеналары ҡатып, ҡалынайып торған хроник артерия ауырыуы*)

**АРТЕ́РИЯ** *ж* **1.** артерия (*ҡанды йөрәктән тәнгә тарата торған ҡан тамыры*); **со́нная арте́рия** йоҡо артерияһы; **лёгочная арте́рия** үпкә артерияһы **2.** *перен.* артерия (*ҡуберәк һыу юлы тураһында*); **гла́вная во́дная арте́рия страны́** илдең төп һыу артерияһы

**АРТИ́КЛЬ** *м*; *грам.* артикль; **определённый арти́кль** билдәлелек артикле; **неопределённый арти́кль** билдәһеҙлек артикле

**АРТИ́КУЛ** *м* артикул (**1.** *кит.*, *иҫк. законда* (*ҡанунда*), *бойоroҡта, килешеүҙә һ.б. рәсми акттарҙа айырым мәҡәлә, бүлек йәки параграф* **2.** *тауар тибы*)

**АРТИКУЛИ́РОВАТЬ** *несов.*; *лингв.* артикуляция яһау

**АРТИКУЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое артикуляцион; **артикуляцио́нное измене́ние зву́ков** өндәрҙең артикуляцион үҙгәреше

**АРТИКУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* артикуляция (*теге йәки был өндө әйткәндә телмәр ағзаларының торошо*); **ме́сто артикуля́ции зву́ков** өндөң артикуляция урыны; **артикуля́ция зву́ков** өндәр артикуляцияһы; **артикуля́ция согла́сных** тартынҡылар артикуляцияһы; **артикуля́ция гла́сных** һуҙынҡылар артикуляцияһы

**АРТИЛЛЕРИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое артиллерия ...ы; **артиллери́йский полк** артиллерия полкы; **артиллери́йский снаря́д** артиллерия снаряды

**АРТИЛЛЕРИ́СТ** *м* **1.** артиллерист; **служи́ть артиллери́стом** артеллерист булып хеҙмәт итеү **2.** *ист.* тупсы; **ста́рый артиллери́ст** ҡарт тупсы

**АРТИЛЛЕ́РИЯ** *ж* **1.** артиллерия (*төрлө калибрҙағы һәм конструкциялағы орудие*); **зени́тная артилле́рия** зенит артиллерияһы; **самохо́дная артилле́рия** үҙйөрөшлө артиллерия; **тяжёлая артилле́рия** ауыр артиллерия **2.** (*род войск*) артиллерия (*орудие менән ҡоралланған ғәскәр төрө*); **служи́ть в артилле́рии** артиллерияла хеҙмәт итеү

**АРТИ́СТ** *м* и **АРТИ́СТКА** *ж* **1.** артист (*актёр, йырсы, музыкант һ.б. тураһында*); **заслу́женный арти́ст** атҡаҙанған артист; **популя́рный арти́ст** танылған артист; **о́перный арти́ст** опера артисы; **эстра́дный арти́ст** эстрада артисы **2.** *перен.*, *разг.* оҫта башҡарыусы; **арти́ст в своём де́ле** үҙ эшенең оҫтаһы, эшен оҫта башҡарыусы, маһир

**АРТИСТИ́ЗМ** *м* артистизм, башҡарыу оҫталығы (маһирлығы); **врождённый, приро́дный артисти́зм** тәбиғи, тыумыштан килгән артистизм; **оце́нка за артисти́зм** башҡарыу оҫталығы өсөн баһа

**АРТИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** артист ...ы; **артисти́ческая нату́ра** артист булмышы **2.** артистарса оҫта; **артисти́ческое исполне́ние** артистарса оҫта башҡарыу; **артисти́ческое мастерство́** артистарса оҫталыҡ

**АРТИСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* юғары оҫталыҡ; **артисти́чность исполне́ния** юғары башҡарыу оҫталығы

**АРТИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бик оҫта, һөнәрен камил үтәгән

**АРТИШО́К** *м* хәшәф үләне

**АРТРИ́Т** *м*; *мед.* быуын шеше; **ревмати́ческий артри́т** ревматизм быуын шеше

**А́РФА** *ж*; *муз.* арфа (*ҡыллы музыка ҡоралы*) ♦ **эо́лова а́рфа** *см.* **эо́лов**

**АРФИ́СТ** *м* арфасы, арфала уйнаусы ир-ат; **арфи́стка** *ж* арфасы ҡатын-ҡыҙ

**АРХАИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **архаизи́ровать**

**АРХАИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *лит.*, *иск.* боронғолаштырыу, иҫкегә ҡайтарыу

**АРХАИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **архаизи́ровать**

**АРХАИ́ЗМ** *м* **1.** боронғолоҡ, иҫкелек **2.** *лингв.* архаизм (*иҫкереп, дөйөм ҡулланылыштан төшөп ҡалған һүҙбәйләнеш йәки грамматик форма*)

**АРХА́ИКА** *ж* боронғолоҡ, иҫкелек һәм уларҙың айырым һыҙаттары

**АРХАИ́СТ** *м* архаизм яҡлы кеше

**АРХАИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое боронғоға, иҫкегә тартҡан (*әҙәби әҫәр йәки сәнғәт әҫәре*); **архаисти́ческое иску́сство** боронғо сәнғәт; **архаисти́ческая литерату́ра** боронғо әҙәбиәт

**АРХАИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** архаик, боронғоға, иҫкегә хас, боронғоға ҡараған; **архаи́ческая эпо́ха** боронғоға ҡараған (архаик) дәүер **2.** иҫкергән, ҡулланыуҙан сыҡҡан; **архаи́ческое выраже́ние** боронғо әйтем

**АРХАИ́ЧНОСТЬ** *ж* боронғолоҡ, иҫкелек

**АРХАИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое боронғо, иҫке; **архаи́чный стиль** боронғо стиль; **архаи́чное сло́во** иҫкергән һүҙ; **архаи́чная фо́рма** иҫкергән форма

**АРХА́НГЕЛ** *м* архангел (*христиан динендә юғары дәрәжәләге фәрештә*)

**АРХА́Р** *м* архар, ҡырағай тәкә

**АРХА́РОВЕЦ** *м*; *прост.* **1.** *уст.* полиция хеҙмәткәре **2.** янъялсы, боласы, йолҡош, өтөк, берәҙәк

**АРХЕ́ЙСКИЙ: архе́йская э́ра** *геол.* архей эраһы (азой) (*Ер шарының иң боронғо эраһы*)

**АРХЕО́ГРАФ** *м* археограф

**АРХЕОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое археографик, археография ...ы; **археографи́ческая рабо́та** археографик эш; **археографи́ческая коми́ссия** археографик комиссия; **археографи́ческий па́мятник** археография ҡомартҡыһы

**АРХЕОГРА́ФИЯ** *ж* археография (*боронғо яҙма ҡомартҡыларҙы йыйыу, өйрәнеү һәм баҫырға әҙерләүҙе маҡсат итеп ҡуйған ярҙамсы тарих фәне*); **полева́я археогра́фия** ялан археографияһы

**АРХЕО́ЛОГ** *м* археолог

**АРХЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** археология ...ы; **археологи́ческий музе́й** археология музейы **2.** археологик; **археологи́ческий па́мятник** археологик ҡомартҡы; **археологи́ческая экспеди́ция** археологик экспедиция

**АРХЕОЛО́ГИЯ** *ж* археология (*һаҡланып ҡалған матди ҡомартҡылар буйынса боронғо халыҡтарҙың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнгән фән*)

**АРХИ́В** *м* архив (**1.** *үткәндең яҙма һәм график ҡомартҡыларын махсус һаҡлау, системалаштырыу һәм һүрәтләү менән шөғөлләнгән учреждение* **2.** *ойошманың иҫке документтарҙы, ябылған эштәрҙе һ.б. һаҡлаған бүлеге* **3.** *ниндәйҙер ойошма йәки айырым кешенең эшмәкәрлегенә ҡараған хаттар, ҡулъяҙмалар, фотографиялар һ.б. йыйылмаһы*); **нау́чный архи́в** ғилми архив; **госуда́рственный архи́в** дәүләт архивы

**АРХИВА́РИУС** *м* архивариус (*архив һаҡлаусы йәки архивта эшләүсе кеше*)

**АРХИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое архив ...ы, **архи́вный материа́л** архив материалы; **архи́вные дела́** архив эш ҡағыҙҙары

**АРХИВИ́СТ** *м* архивсы

**АРХИЕПИ́СКОП** *м* архиепископ (*епископ менән митрополит араһындағы рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәгә эйә кеше*)

**АРХИЕРЕ́Й** *м* архиерей (*православие дине башлыҡтары — епископ, архиепископ, митрополит кеүек юғары дәрәжә руханиҙары өсөн дөйөм атама*)

**АРХИМАНДРИ́Т** *м* архимандрит (*монахтар өсөн юғары рухани дәрәжә, монастырь настоятеле титулы, шулай уҡ ошо дәрәжәләргә эйә кеше*)

**АРХИПА́СТЫРЬ** *м* архипастырь (*юғары дәрәжәле руханиҙарҙы — епископты, митрополитты, патриархты ололап әйтелгән боронғо атама*; *өлкән пастырь*)

**АРХИПЕЛА́Г** *м* архипелаг (*бер-берећенә яҡын ятҡан утрауҙар төркөмө*); **Гре́ческий архипела́г** Грек архипелагы

**АРХИТЕКТО́НИКА** *ж* архитектоника (**1.** *архит. өлөштәрҙең бер сама тигеҙ урынлашыуы, уларҙың бер бөтөн гармониялы ҡушылыуы* **2.** *сәнғ. әҫәрҙең художество бөтөнлөгө, композицияһы, төҙөлөшө.* **3.** *геол. геологик төҙөлөштөң, теге йәки был урын тау тоҡомдарының ятыу йәки урынлашыу үҙенсәлектәре*)

**АРХИТЕКТОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое архитектоник; **архитектони́ческое разли́чие** архитектоник айырма; **архитектони́ческая фо́рма** архитектоник форма

**АРХИТЕ́КТОР** *м* архитектор; **гла́вный архите́ктор го́рода** ҡаланың баш архитекторы; **архите́ктор прое́кта** проект(тың) архитекторы

**АРХИТЕ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое архитектура ...ы; **архите́кторские ка́дры** архитектура кадрҙары

**АРХИТЕКТУ́РА** *ж* архитектура (**1.** *төҙөлөштө проектлау, башҡарыу һәм биҙәү сәнғәте, оҫталығы* **2.** *төҙөлөштөң характеры, стиле*); **готи́ческая архитекту́ра** готика архитектураһы; **рома́нская архитекту́ра** роман архитектураһы; **институ́т архитекту́ры** архитектура институты

**АРХИТЕКТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое архитектура ...ы; **архитекту́рный институ́т** архитектура институты; **архитекту́рные па́мятники** архитектура ҡомартҡылары

**АРШИ́Н** *м* аршын (**1.** *метрик системаны индергәнгә тиклем ҡулланылған 0,711 метрға тиң урыҫ оҙонлоҡ үлсәү берәмеге* **2.** *шул оҙонлоҡтағы вершоктарға һәм сиректәргә бүлгеләнгән һыҙыҡтары булған линейка*); **дели́ть на арши́ны** аршынлап бүлеү; **ме́рить арши́нами** аршын менән үлсәү; **ме́рою в оди́н арши́н** бер аршынлы ♦ **ме́рить на свой арши́н** үҙ бизмәненә һалыу; **ме́рить обыкнове́нным (о́бщим) арши́ном** дөйөм талаптан сығып ҡарау, ғәҙәти күренеш тип һанау; **как (сло́вно, бу́дто) арши́н проглоти́л** уҡлау йотҡанмы ни (*кәүҙәһен яһалма төҙ тотҡан кешегә ҡарата*)

**АРШИ́ННИК** *м*; *уст.*, *прост.* аршын ҡоло (*сауҙагәрҙәрҙән көлөп әйтелгән һүҙ*)

**АРШИ́ННЫЙ,** -ая, -ое аршынлы

**АРЫ́К** *м* арыҡ

**АРЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое арыҡ ...ы; **ары́чное ороше́ние** арыҡ һуғарыуы, арыҡ менән һуғарыу

**АРЬЕРГА́РД** *м* арьергард, сардауыл (*походта барғанда төп көстәрҙең артында тыл хәүефһеҙлеген тәьмин иткән ғәскәр йәки флот часы*); **находи́ться в арьерга́рде** сардауылда барыу (булыу, тороу)

**АРЬЕРГА́РДНЫЙ,** -ая, -ое арьергард ...ы; **арьерга́рдные ча́сти** арьергард частары; **арьерга́рдные бои́** арьергард һуғыштары

**АС** *м* **1.** ас, иң оҫта, батыр (*осоу һәм һуғышыу оҫталығы менән танылған һөжүм итеүсе осоусы, һауа һуғышы оҫтаһы*); **возду́шный ас** иң оҫта, батыр осоусы **2.** *перен.* үҙ эшенең оҫтаһы

**АСБЕ́СТ** *м* асбест (*утҡа һәм кислотаға сыҙамлы сүсле минерал*)

**АСБЕ́СТОВЫЙ,** -ая, -ое асбест ...ы, асбест; **асбе́стовый заво́д** асбест заводы; **асбе́стовый рудни́к** асбест руднигы; **сде́ланный из асбе́ста** асбестан эшләнгән; **асбе́стовая ткань** асбест туҡыма

**АСЕ́ПТИКА** *ж*; *мед.* асептика (*яраны зарарһыҙландырып, ауырыу йоғоуҙан һаҡлау саралары*)

**АСЕПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое асептик; **асепти́ческая повя́зка** асептик бәйләмес

**АСЕ́ССОР** *м* асессор (*Боронғо Римда, урта быуат Европаһында, Рәсәйҙә XVIII б. башы — XIX б. икенсе яртыһынан судта вазифалы кеше*; *заседатель*) ♦ **колле́жский асе́ссор** *уст.* коллегия асессоры

**АСИММЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **асимметри́чный**

**АСИММЕТРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое асимметриялы, симметрияһыҙ

**АСИММЕТРИ́Я** *ж* асимметрия, симметрияһыҙлыҡ; **явле́ние асимметри́и** асимметрия күренеше

**АСКАРИ́ДЫ** *мн.*; *зоол.* (*ед.* **аскари́да** *ж*) аскарида (*һөтимәрҙәрҙең һәм кешенең эсәктәрендә туҡланып йәшәгән йомро селәүсен*)

**АСКЕ́Т** *м* аскет, дәрүиш

**АСКЕТИ́ЗМ** *м* **1.** аскетлыҡ, дәрүишлек (*донъя рәхәтенән ваз кисеү*); **пропове́довать аскети́зм** дәрүишлеккә өндәү **2.** аскетизм (*дини этик тәғлимәт*)

**АСКЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое аскетлыҡ ...ы, дәрүишлек; **аскети́ческая жизнь** дәрүиштәрсә көн итеү

**АСКОРБИ́НОВЫЙ: аскорби́новая кислота́** аскорбин кислотаһы

**АСПЕ́КТ** *м* аспект, ҡараш; **филосо́фский аспе́кт** фәлсәфәүи ҡараш

**А́СПИД I** *м* **1.** *зоол.* аспид (*тропик һәм субтропик илдәрҙә осраған ағыулы йылан төрө*) **2.** *перен.*, *бран.* ҡара йылан (*яуыз кешегә ҡарата*)

**А́СПИД II** *м*; *уст. см.* **а́спидный сла́нец**

**А́СПИДНЫЙ,** -ая, -ое аспид, аспидтан эшләнгән; **а́спидная доска́** аспид таҡта ♦ **а́спидный сла́нец** аспид, һәүерташ

**АСПИРА́НТ** *м* и **АСПИРА́НТКА** *ж* аспирант

**АСПИРА́НТСКИЙ,** -ая, -ое аспирант ...ы; **аспира́нтская стипе́ндия** аспирант стипендияһы

**АСПИРАНТУ́РА** *ж* аспирантура; **целева́я аспиранту́ра** маҡсатлы аспирантура; **поступи́ть в аспиранту́ру** аспирантураға инеү

**АСПИРА́ТОР** *м* аспиратор (*һауаның, газдың химик составын, саң, һ.б. булыу-булмауын тикшереү өсөн ҡулланылған прибор*)

**АСПИРИ́Н** *м*; *фарм.* аспирин; **табле́тки аспири́на** аспирин таблеткалары; **принима́ть аспири́н** аспирин эсеү

**АССАМБЛЕ́Я** *ж* ассамблея (**1.** *халыҡ-ара ойошма ағзаларының дөйөм йыйылышы* **2.** *Пётр I заманындағы бал, йәмәғәтселек йыйылышы*) ♦ **Генера́льная Ассамбле́я Организа́ции Объединённых На́ций** Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы

**АССЕНИЗА́ТОР** *м* ассенизатор, сүп-сар таҙартыусы

**АССЕНИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое ассенизация ...ы; **ассениза́торская рабо́та** таҙалау хеҙмәте

**АССЕНИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ассенизация ...ы; **ассенизацио́нная маши́на** ассенизация машинаһы

**АССЕНИЗА́ЦИЯ** *ж* сүп-сарҙан таҙалау хеҙмәте; **проводи́ть ассениза́цию** ассенизация үткәреү, сүп-сар таҙартыу

**АССИГНА́ЦИЯ** *ж* ассигнация (*Рәсәйҙә 1769—1843 йй. ғәмәлдә булған ҡағыҙ аҡса*)

**АССИГНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ассигнация ...ы; **госуда́рственный ассигнацио́нный банк** дәүләт ассигнация банкыһы

**АССИГНОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ассигнова́ть 2.** бүленгән аҡса; **бюдже́тное ассигнова́ние** бюджеттан бүленгән аҡса; **дополни́тельное ассигнова́ние** өҫтәмә рәүештә бүленгән аҡса; **ассигнова́ние на здравоохране́ние** һаулыҡ һаҡлау эшенә бүленгән аҡса

**АССИГНОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* *что* ассигнациялау, ассигнация бүлеү

**АССИГНОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **ассигнова́ть**

**АССИГНО́ВКА** *ж*; *уст.*, *фин.* ассигновка (*кредит хужаһының банкыға ассигнация суммаһын түләр йәки күсерер өсөн хоҡуҡ биргән һәм банкыға адресланған документы*); **получа́ть де́ньги по ассигно́вкам** ассигновка менән аҡса алыу

**АССИГНО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **ассигнова́ть**

**АССИГНО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **ассигно́вывать**

**АССИМИЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** ассимиляцияға дусар итеү, үҙенә яраштырыу; **переселе́нцы ассимили́ровали абориге́нов** килгән халыҡ аборигендарҙы ассимиляцияға дусар итте **2.** *биол.* үҙләштереү, һеңдереү; **ассимили́ровать кислоро́д во́здуха** һауаның кислородын үҙләштереү

**АССИМИЛИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов.* **1.** ассимиляцияға бирелеү, кемгәлер (нимәгәлер) оҡшау **2.** *биол.* үҙләштерелеү, һеңеү

**АССИМИЛЯТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое ассимилятив; **ассимиляти́вные явле́ния** ассимилятив күренештәр

**АССИМИЛЯ́ТОР** *м* ассимиляция яһаусы

**АССИМИЛЯ́ТОРСТВО** *с* ассимиляторлыҡ, көсләп тағыу; **поли́тика ассимиля́торства** ассимиляторлыҡ сәйәсәте

**АССИМИЛЯ́ЦИЯ** *ж* **1.** ассимиляция, оҡшашыу; **языкова́я ассимиля́ция** телдәр ассимиляцияһы; **ассимиля́ция зву́ков** телмәр өндәренең ҡайһы бер сифаттарының оҡшашыуы, өндәр ассимиляцияһы **2.** *биол.* үҙләштереү, һеңдереү

**АССИРИ́ЙЦЫ** *мн.* **1.** ассирий кешеһе (*Ираҡта, БДБ илдәрендә, Грузияла, Төркиәлә һ.б. ҡайһы бер илдәрҙә йәшәйҙәр*) **2.** Ассирия халҡы (*Боронғо Ассирия дәүләтенең халҡы*) // *ед.* **ассири́ец** *м* ассирий ир-аты; **ассири́йка** *ж* ассирий ҡатын-ҡыҙы

**АССИСТЕ́НТ** *м* ассистент, ғилми ярҙамсы; **ассисте́нт ка́федры матема́тики** математика кафедраһы ассистенты; **ассисте́нт врача́** врач (табип) ярҙамсыһы

**АССИСТЕ́НТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ассистент ...ы; **ассисте́нтская до́лжность** ассистент вазифаһы **2.** ассистентлыҡ ...ы; **ассисте́нтские обя́занности** ассистентлыҡ бурыстары

**АССИСТИ́РОВАТЬ** *несов. кому* и *без доп.* ассистентлыҡ эшен башҡарыу, ассистентлыҡ итеү; **ассисти́ровать профе́ссору** профессорға ассистентлыҡ итеү

**АССОНА́НС** *м*; *лит.* ассонанс (**1.** *шиғырҙа оҡшаш һуҙынҡы өндәрҙең ҡабатланыуы* **2.** *баҫымлы һуҙынҡылар тап килеүгә генә ҡоролған рифма*)

**АССОНА́НСНЫЙ,** -ая, -ое ассонанс, ассонанслы; **ассона́нсная ри́фма** ассонанслы рифма; **ассона́нсные стро́ки** ассонанс юлдар

**АССОРТИ́** *с нескл.*, ассорти; **ассорти́ из фру́ктов** емештәрҙән ассорти

**АССОРТИМЕ́НТ** *м* ассортимент (**1.** *тауарҙың төрлө-төрлө сорттары* **2.** *бер өлкәлә етештерелгән йәки һатылған тауарҙарҙың төрҙәр йыйылмаһы*); **ассортиме́нт проду́ктов** аҙыҡ ассортименты; **расши́рить ассортиме́нт** ассортиментты киңәйтеү; **разнообра́зить ассортиме́нт** ассортимент төрләндереү

**АССОРТИМЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое ассортимент ...ы; **ассортиме́нтный ми́нимум** ассортимент минимумы

**АССОЦИАТИ́ВНОСТЬ** *ж* ассоциативлыҡ

**АССОЦИАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *псих.* **1.** ассоциатив; **ассоциати́вная связь** ассоциатив бәйләнеш **2.** ассоциация ...ы; **ассоциати́вный проце́сс** ассоциация процесы

**АССОЦИА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*объединение*) берекмә, ассоциация; **ассоциа́ция нау́чных рабо́тников** ғилми хеҙмәткәрҙәр берекмәһе; **краеве́дческая ассоциа́ция** тыуған яҡты өйрәнеүселәр берекмәһе **2.** (*группа, соединение чего-л.*) төркөм, берләшмә, ҡушылма; **ассоциа́ция моле́кул** молекулалар төркөмө; **звёздная ассоциа́ция** йондоҙҙар төркөмө; **ассоциа́ция расте́ний** үҫемлектәр ҡушылмаһы **3.** *псих.* ассоциация, сәбәпле бәйләнеш; **ассоциа́ция по схо́дству** оҡшашлыҡ буйынса ассоциация; **возникнове́ние ассоциа́ции** ассоциация барлыҡҡа килеү

**АССОЦИИ́РОВАНИЕ** *с см.* **ассоции́ровать**

**АССОЦИИ́РОВАТЬ** *сов., несов.*; *псих.* ассоциация тыуҙырыу, ассоциациялаштырыу

**АССОЦИИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* ассоциацияға инеү, ассоциациялашыу **2.** *сов., несов.* төркөмдәргә берләшеү, ҡушылыу **3.** *только несов. страд. от* **ассоции́ровать**

**АСТЕ́НИК** *м*; *разг.* астения менән ауырыу кеше

**АСТЕНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* астеник, хәлһеҙ

**АСТЕНИ́Я** *ж*; *мед.* астения, хәлһеҙлек (*организмдың дөйөм хәлһеҙлеге*)

**АСТЕРО́ИДЫ** *мн.* (*ед.* **астеро́ид** *м*); *астр.* астероидтар; **орби́та астеро́идов** астероидтар орбитаһы

**АСТИГМАТИ́ЗМ** *м*; *опт.* астигматизм (*күҙҙең оптик сағылдырыуы йәки һындырып сағылтыу һәләтенең кәмселеге; бер нөктәнән сыҡҡан нурҙарҙың киренән бер фокуста йыйылмауы һәм шул арҡала һүрәттәрҙең сыбарланыуы, томанланыуы*)

**АСТИГМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *опт.* астигматик

**А́СТМА** *ж*; *мед.* быума, тын ҡыҫылыуы, астма; **бронхиа́льная а́стма** ҡурылдай астмаһы (бронхиаль астма); **серде́чная а́стма** йөрәк астмаһы

**АСТМА́ТИК** *м*; *разг.* астматик, астма менән ауырыусы

**АСТМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** астма ...ы; **астмати́ческий при́ступ** астма өйәнәге **2.** астматик; **астмати́ческое явле́ние** астматик күренеш

**А́СТРА** *ж* йондоҙ сәскә, астра; **альпи́йская а́стра** альп астраһы, альп йондоҙ сәскәһе; **а́стра махро́вая** йөнтәҫ йондоҙ сәскә

**АСТРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йондоҙ ...ы; **астра́льный свет** йондоҙ яҡтыһы; **астра́льные ку́льты дре́внего ми́ра** боронғо донъяның йондоҙ культтары

**АСТРОБОТА́НИКА** *ж* астроботаника (*астрономияла планеталарҙың үҫемлектәр үҫкән ҡатламын өйрәнгән бүлеге*)

**АСТРО́ЛОГ** *м* астролог, астрология белгесе

**АСТРОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое астрологик; **астрологи́ческое предсказа́ние** астрологик күрәҙәлек

**АСТРОЛО́ГИЯ** *ж* астрология (*борон заман барлыҡҡа килгән, күк йөҙөндәге яҡтыртҡыс есемдәрҙең ерҙәге хәл-ваҡиғаларға һәм кеше тормошона йоғонто яһауы тураһындағы тәғлимәт; күк есемдәренең урынлашыуына ҡарап киләсәкте алдан билдәләү менән шөғөлләнә*)

**АСТРОЛЯ́БИЯ** *ж* астролябия (*элекке оҙонлоҡ үлсәү ҡулланмаһы*)

**АСТРОМЕ́ТРИЯ** *ж* астрометрия (*астрономияның бер бүлеге*)

**АСТРОНА́ВТ** *м* астронавт (**1.** *астронавтика белгесе* **2.** *космонавт*)

**АСТРОНА́ВТИКА** *ж* астронавтика (*оҫҡос аппараттарҙың ғаләм арауығында осоуын өйрәнгән фән*)

**АСТРОНО́М** *м* астроном, астрономия белгесе

**АСТРОНОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** астрономия ...ы; **астрономи́ческая обсервато́рия** астрономия обсерваторияһы **2.** астрономик; **астрономи́ческое откры́тие** астрономик асыш; **астрономи́ческие наблюде́ния** астрономик күҙәтеүҙәр; **астрономи́ческие инструме́нты** астрономик ҡорамалдар ♦ **астрономи́ческие чи́сла (ци́фры)** үтә ҙур дәүмәлле һандар

**АСТРОНО́МИЯ** *ж* астрономия; **занима́ться астроно́мией** астрономия менән шөғөлләнеү

**АСТРОФИ́ЗИКА** *ж* астрофизика (*астрономияның бер бүлеге*)

**АСФА́ЛЬТ** *м* асфальт; **покрыва́ть асфа́льтом** асфальт түшәү (йәйеү); **мо́крый асфа́льт** еүеш асфальт; **идти́ по асфа́льту** асфальттан барыу

**АСФАЛЬТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **асфальти́ровать**; **асфальти́рование у́лиц и площаде́й** урамдарҙы һәм майҙандарҙы асфальтлау

**АСФАЛЬТИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое асфальтлы, асфальт түшәлгән; **асфальти́рованная у́лица** асфальтлы урам; **асфальти́рованный тротуа́р** асфальтлы тротуар; **доро́га асфальти́рована** юл асфальтланған, асфальт түшәлгән юл

**АСФАЛЬТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* асфальт түшәү (йәйеү), асфальтлау; **асфальти́ровать пло́щадь** майҙанға асфальт түшәү; **асфальти́ровать у́лицу** урам асфальтлау

**АСФАЛЬТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **асфальти́ровать**

**АСФАЛЬТОБЕТО́Н** *м* асфальтлы бетон

**АСФА́ЛЬТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** асфальт ...ы; **асфа́льтовое произво́дство** асфальт етештереү **2.** асфальт(лы), асфальт түшәлгән; **асфа́льтовые тротуа́ры** асфальтлы тротуарҙар

**АСЬ** *межд.*; *прост.* ә, нимә

**АТАВИ́ЗМ** *м* атавизм (*алыҫ ата-бабала булған билдәләрҙең ошо көндә йәшәгән кешелә, хайуандарҙа, үҫемлектәрҙә осраҡлы рәүештә барлыҡҡа килеүе*)

**АТАВИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое атавизм ...ы; **атависти́ческие явле́ния** атавизм күренештәре

**АТА́КА** *ж* **1.** һөжүм, атака; **психи́ческая ата́ка** психик һөжүм; **штыкова́я ата́ка** штык менән һөжүм итеү; **броса́ться в ата́ку** һөжүмгә ташланыу; **отрази́ть (отби́ть) ата́ку** һөжүмде кире ҡағыу; **идти́ в ата́ку** һөжүмгә күтәрелеү **2.** атакалау; **ата́ка вра́жеских пози́ций** дошман позицияларына һөжүм итеү **3.** (*нападение конницы*) сабауыл

**АТАКОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* һөжүм итеү, атакалау; **атакова́ть врага́** дошманға һөжүм итеү

**АТАКОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **атакова́ть**

**АТАКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **атакова́ть**

**АТАКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **атако́вывать**

**АТАМА́Н** *м* атаман; **войсково́й атама́н** ғәскәри атаман; **атама́н разбо́йников** юлбаҫарҙар атаманы

**АТАМА́НИТЬ** *несов.*; *разг., уст. см.* **атама́нствовать**

**АТАМА́НСКИЙ,** -ая, -ое атаман ...ы; **атама́нские обя́занности** атаман бурыстары

**АТАМА́НСТВО** *с* атаманлыҡ (*дәрәжә һәм вазифа*)

**АТАМА́НСТВОВАТЬ** *несов.* атаманлыҡ итеү, атаман булыу

**АТЕИ́ЗМ** *м* атеизм, аллаһыҙлыҡ, динһеҙлек, дәһрилек

**АТЕИ́СТ** *м* атеист, аллаһыҙ, динһеҙ кеше, дәһри

**АТЕИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое атеистик, дәһри; **атеисти́ческая литерату́ра** атеистик әҙәбиәт; **атеисти́ческая пропага́нда** атеистик пропаганда

**АТЕЛЬЕ́** *с нескл.* ателье, оҫтахана (**1.** *рәссам, скульптор, фотограф оҫтаханаһы* **2.** *өҫ кейеме һәм аяҡ кейемдәре тегеү оҫтаханаһы*); **ателье́ мод** мода ательеһы; **ателье́ прока́та** прокат (ҡуртым) ательеһы; **шве́йное ателье́** тегеү ательеһы; **телевизио́нное ателье́** телевизорҙар ательеһы

**АТЕРОСКЛЕРО́З** *м*; *мед.* атеросклероз

**АТЛА́НТЫ** *мн.* (*ед.* **атла́нт** *м*); *архит.* атланттар (*ҡыйыҡты, түшәмде тотоп торған ҡеүәтле ир-ат ҡиәфәтендәге таяуҙар*)

**А́ТЛАС** *м* атлас (*географик карталар йыйынтығы*); **а́тлас автомоби́льных доро́г** автомо-

биль юлдары атласы; **а́тлас ми́ра** донъя атласы; **железнодоро́жный а́тлас** тимер юл(дар) атласы

**АТЛА́С** *м* (*ткань*) атлас

**АТЛА́СИСТЫЙ,** -ая, -ое *см.* **атла́сный** 2

**АТЛА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** атлас; **атла́сная ткань** атлас туҡыма; **атла́сное одея́ло** атлас юрған **2.** *перен.* шыма, ялтыр, атлас һымаҡ

**АТЛЕ́Т** *м* атлет (**1.** *ҙур көс талап итә торған күнегеүҙәр менән шөғөлләнгән цирк артисы йәки спортсы* **2.** *мыҡты кәүҙәле, ҙур физик көскә эйә кеше* **3.** *атлетика менән шөғөлләнгән спортсы*)

**АТЛЕ́ТИКА** *ж* атлетика; **лёгкая атле́тика** еңел атлетика; **тяжёлая атле́тика** ауыр атлетика

**АТЛЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** атлетик; **атлети́ческие упражне́ния** атлетик күнекмәләр **2.** атлеттарға хас, атлеттар һымаҡ; **атлети́ческая си́ла** атлеттарға хас көс; **атлети́ческое телосложе́ние** атлеттар һымаҡ мыҡты кәүҙәле

**АТМОСФЕ́РА** *ж* **1.** атмосфера; **атмосфе́ра Земли́** Ерҙең атмосфераһы **2.** *перен.* мөхит, солғаныш; **тво́рческая атмосфе́ра** ижади мөхит; **хоро́шая атмосфе́ра** яҡшы мөхит **3.** *физ.*, *тех.* атмосфера (*баҫымды үлсәү берәмеге*)

**АТМОСФЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **атмосфе́рный**

**АТМОСФЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое атмосфера ...ы; **атмосфе́рный кислоро́д** атмосфера кислороды; **атмосфе́рное давле́ние** атмосфера баҫымы

**А́ТОМ** *м* атом; **разлага́ть а́томы** атомдарҙы тарҡатыу ♦ **ме́ченый а́том** тамғалы атом, инәүле атом

**АТОМА́РНЫЙ,** -ая, -ое атомар; **атома́рный кислоро́д** атомар кислород

**АТОМИ́ЗМ** *м см.* **атоми́стика**

**АТОМИ́СТИКА** *ж* атомистика (*материяның айырым, үтә бәләкәй киҫәксәләрҙән — атомдарҙан торғанын раҫлаған, уның төҙөлөшө тураһындағы тәғлимәт*)

**АТОМИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** атомистик; **атомисти́ческая тео́рия** атомистик теория **2.** атомизм ...ы

**А́ТОМНИК** *м*; *разг.* атомсы (*белгес*)

**А́ТОМНЫЙ,** -ая, -ое атом ...ы; **а́томная бо́мба** атом бомбаһы; **а́томная электри́ческая ста́нция** атом электр станцияһы; **а́томное ору́жие** атом ҡоралы; **а́томное строе́ние** атом төҙөлөшө

**АТОМОХО́Д** *м* атомоход (*атом энергияһын ҡулланыусы карап*)

**А́ТОМЩИК** *м*; *разг.* **1.** *см.* **а́томник** **2.** атом ҡулланыу яҡлы кеше

**АТОНИ́Я** *ж*; *мед.* атония (*тән туҡымаһының һәм мускулдарҙың һүлпәнлеге, хәлһеҙлеге, һығылмалылығы кәмеүе*)

**АТРИБУ́Т** *м* **1.** *филос.* атрибут (*нәмәнең йәки күренештең даими, мөһим, айырылғыһыҙ билдәһе*); **движе́ние — атрибу́т мате́рии** хәрәкәт — материяның атрибуты **2.** хас билдә, атрибут; **пионе́рские атрибу́ты** пионерҙарға хас билдә, пионер атрибуттары **3.** *грам.* атрибут, күрһәткес, билдә

**АТРИБУТИ́ВНОСТЬ** *ж*; *грам.* аныҡлау һәләте, аныҡлау мөмкинлеге

**АТРИБУТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* аныҡлаусы, күрһәтеүсе, билдәләүсе; **атрибути́вные отноше́ния** аныҡлаусы мөнәсәбәттәр

**АТРОПИ́Н** *м*; *мед.* атропин (*спазмаларҙы яҙылдырыу өсөн, шулай уҡ күҙ алмаһын тикшереү маҡсатында ҡулланылған алкалоидлы матдә, дарыу*); **применя́ть атропи́н** атропин ҡулланыу

**АТРОФИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое ҡороған, һулыған, эштән сыҡҡан

**АТРОФИ́РОВАТЬСЯ** *сов.*, *несов.* ҡороу, һулыу, эштән сығыу

**АТРОФИ́Я** *ж*; *биол.*, *мед.* **1.** ҡороу, һулыу, атрофия; бәләкәсәйеү (*ағза-туҡыманың ауырыу йәки эшһеҙлек һөҙөмтәһендә күләм яғынан кәмеүе*); **атрофи́я руки́** ҡул ҡороу **2.** *перен.* юғалыу, бөтөү, тупаҫланыу; **атрофи́я во́ли** ихтыяр юғалыу

**АТТАШЕ́** *м нескл.*; *дип.* атташе (*вәкәләтлектә вазифалы белгес, консультант*); **вое́нный атташе́** хәрби атташе; **торго́вый атташе́** сауҙа атташеһы

**АТТЕСТА́Т** *м* аттестат (**1.** *белем тураһында таныҡлыҡ* **2.** *хәрбиҙәргә бирелгән ҡағыҙ* **3.** *элекке эш урынынан танытма*); **аттеста́т профе́ссора** профессор аттестаты; **де́нежный аттеста́т** аҡса аттестаты; **продово́льственный аттеста́т** аҙыҡ-түлек аттестаты; **получи́ть аттеста́т о сре́днем образова́нии** урта белем тураһында аттестат алыу

**АТТЕСТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое аттестация ...ы; **аттестацио́нная коми́ссия** аттестация комиссияһы; **аттестацио́нное свиде́тельство** аттестация таныҡлығы

**АТТЕСТА́ЦИЯ** *ж* аттестация (*кемгәләр рәсми рәүештә бирелгән баһа, характеристика*); **проводи́ть аттеста́цию** аттестация үткәреү; **пройти́ аттеста́цию** аттестация үтеү

**АТТЕСТОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** аттестациялау, аттестация үткәреү, баһа биреү; **аттестова́ть учителе́й** уҡытыусыларҙы аттестациялау **2.** дәрәжә биреү; **аттестова́ть ста́ршим сержа́нтом** өлкән сержант дәрәжәһе биреү **3.** белемен баһалау, билдә ҡуйыу; **аттестова́ть ученико́в** уҡыусыларҙың белемен баһалау ♦ **аттестова́ть себя́** үҙеңде күрһәтеү, кем икәнеңде танытыу

**АТТЕСТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **аттестова́ть**

**АТТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое Аттика ...ы ♦ **атти́ческий диале́кт** аттика диалекты; **атти́ческая соль** *книжн.* әсе көләү, мыҫҡыл итеү

**АТТРАКЦИО́Н** *м*; *театр.* аттракцион (**1.** *цирк йәки эстрада программаһының ҡыҙыҡлы номеры* **2.** *йәмәғәтселек күңел асҡан урындарҙа бәүелсәктәр, атыш урыны, каруселдәр һ.б.*); **цирково́й аттракцио́н** цирк аттракционы

**АТУ́** *межд.*; *охот.* һөс, һөс-сөй! (*һунарға этте һөскөртөү һүҙе*)

**АУ́** *межд.* ау, ау-ау! (*урманда йәки башҡа урында бер-береңә тауыш биргәндә әйтелә*)

**АУДИЕ́НЦИЯ** *ж* аудиенция (*дәүләттә юғары урында эшләгән кешенең рәсми рәүештә ҡабул итеүе*); **ждать аудие́нции** аудиенция көтөү

**АУДИТО́РИЯ** *ж* аудитория; **аудито́рия институ́та** институт аудиторияһы; **заинтересова́ть аудито́рию** аудиторияны ҡыҙыҡһындырыу

**АУ́КАНЬЕ** *с*; *разг.* ауылдау

**АУ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* ауылдау, ауылдап ҡысҡырыу

**АУ́КАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ауылдашыу, ау-ау тип ҡысҡырышыу

**АУ́КНУТЬ** *сов. см.* **ау́кать**

**АУ́КНУТЬСЯ** *сов. см.* **ау́каться** ♦ **как ау́кнется, так и откли́кнется** байрам ашы — ҡара-ҡаршы

**АУКЦИО́Н** *м* аукцион (*берәй мөлкәтте йәки нәмәне халыҡ алдында хаҡты күберәк бирәүсегә һатыу*); **междунаро́дный аукцио́н** халыҡ-ара аукцион; **продава́ть на аукцио́не** аукционда һатыу

**АУКЦИОНИ́СТ** *м* аукционсы, аукционда һатыусы

**АУКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое аукцион ...ы; **аукцио́нный торг** аукцион сауҙаһы

**АУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ауыл ...ы; **ау́льный сове́т** ауыл советы (шураһы)

**А́УТ** *м* аут (*туптың, шайбаның уйын майҙанында һыҙыҡтан ситкә сығыуы*)

**АУТЕНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **аутентичный**

**АУТЕНТИ́ЧНОСТЬ** *ж*; *книжн.* төп нөсхә булыу, ысын булыу; **аутенти́чность докуме́нта** документтың төп нөсхә булыуы

**АУТЕНТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** дөрөҫ, төп; **аутенти́чный текст** төп текст **2.** төп сығанаҡтан сыҡҡан, төп нөсхәгә тап килгән; **аутенти́чное толкова́ние зако́на** законды (ҡанунды) төп сығанаҡҡа таянып аңлатыу

**АУТОДАФЕ́** *с нескл.* аутодафе (*урта быуаттарҙа инквизиция хөкөмө менән еретиктарҙы, уларҙың яҙмаларын халыҡ алдында яндырыу*)

**АФГА́НСКИЙ,** -ая, -ое афған ...ы, Афғанстан ...ы; **афга́нский наро́д** афған халҡы; **афга́нский язы́к** афған теле

**АФГА́НЦЫ** *мн.* афғандар, афған халҡы // *ед.* **афга́нец** *м* афған ир-аты; **афга́нка** *ж* афған ҡатын-ҡыҙы

**АФЕ́РА** *ж* афера, намыҫһыҙ (бысраҡ) эш; **вовле́чь в афе́ру** бысраҡ эшкә ылыҡтырыу

**АФЕРИ́СТ** *м* и **АФЕРИ́СТКА** *ж* аферист, хәтәр эш менән шөғөлләнгән кеше

**АФИ́ША** *ж* афиша, иғлан; **театра́льная афи́ша** театр афишаһы

**АФИШИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** афиша менән белдереү, иғлан итеү **2.** асып һалыу, белдереү; **афиши́ровать свои́ отноше́ния** *с кем-л.* *кем менәндер* мөнәсәбәтеңде асып һалыу

**АФИШИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **афиши́ровать**

**АФОРИ́ЗМ** *м* афоризм (*тәрән мәғәнәле ыҡсым һүҙбәйләнеш, һөйләм, мәҡәл*); **употребля́ть в ре́чи афори́змы** телмәрҙә афоризмдар ҡулланыу

**АФОРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое афористик; **афористи́ческий жанр** афористик жанр; **афористи́ческий стих** афористик шиғыр

**АФОРИСТИ́ЧНОСТЬ** *ж* афористиклыҡ, тапҡырлыҡ; **афористи́чность ре́чи** телмәрҙең тапҡырлығы (*мәғәнә яғынан*)

**АФОРИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое афоризмлы; **афористи́чное выска́зывание** афоризмлы һүҙ

**АФРИКА́НСКИЙ,** -ая, -ое Африка ...ы; **африка́нские языки́** Африка телдәре; **африка́нские пусты́ни** Африка сүллектәре

**АФРИКА́НЦЫ** *мн.* африкандар, Африка халҡы // *ед.* **африка́нец** *м* африкан, Африка ир-аты; **африка́нка** *ж* Африка ҡатын-ҡыҙы

**АФФЕ́КТ** *м* аффект, ярһыу, ҡыҙыу

**АФФЕКТА́ЦИЯ** *ж* ҡылансыҡлыҡ, шашыныу, үҙеңде яһалма тотоу

**АФФЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое көслө тойғоло, аффектив; **аффекти́вная речь** көслө тойғоло телмәр

**АФФЕКТИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое ҡабартылған, яһалма арттырылған

**АФФЕКТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* артыҡ ярһыу, шашып китеү, тәьҫирле, ярһып һөйләү

**А́ФФИКС** *м* аффикс, ялғау; **словообразова́тельные а́ффиксы** һүҙ яһаусы ялғауҙар

**АФФРИКА́ТА** *ж*; *лингв.* аффриката; **произноше́ние аффрика́т** аффрикаталарҙың әйтелеше

**АХ** *межд.* **1.** ай; **ах, упадёт же** ай, ҡолай бит **2.** эй; **ах, я забы́л вас предупреди́ть** эй, һеҙгә әйтергә онотҡанмын **3.** уй; **ах, не му́чьте меня́** уй, яфаламағыҙсы мине **4.** их; **ах ты, моё го́ре** их һин, ҡайғым минең ♦ **ах да** уй алла (*онотолған нәмә ҡапыл иҫкә төшкәндә ҡулланыла*)

**А́ХАНЬЕ** *с*; *разг.* ах итеү

**А́ХАТЬ** *несов. от* **а́хнуть**

**АХИЛЛЕ́СОВ: ахилле́сова пята́** *кого, чья* йомшаҡ урын, йән ер

**АХИНЕ́Я** *ж*; *разг.* мәғәнәһеҙ һүҙ, юҡ-бар нәмә, сафсата; **нести́ ахине́ю** юҡ-бар һөйләү

**А́ХНУТЬ** *сов.* **1.** ахылдап ҡуйыу, ах итеү; **а́хнуть от восто́рга** һоҡланып, ах итеп ҡысҡырып ебәреү **2.** *прост.* гөрһөлдәү; **пу́шки а́хнули** туптар гөрһөлдәп ҡуйҙы **3.** *прост.* сәпәү; **а́хнуть по скуле́** биткә сәпәү

**А́ХОВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** насар, яман, эшәке; **а́ховая жизнь** насар тормош **2.** шуҡ, дыуамал; **наро́д а́ховый** халыҡ бик дыуамал; **3.** иҫ киткес, ғәжәп; **а́ховые наря́ды** ғәжәп кейемдәр

**АХРОМАТИ́ЗМ** *м*; *опт.* ахроматизм (*оптик быяланың яҡтылыҡ нурҙарын төҫтәргә таркатмай һындырыу үҙенсәлеге*)

**АХРОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *опт.* ахроматик; **ахромати́ческая ли́нза** ахроматик линза; **ахромати́ческие стёкла** ахроматик быялалар

**АХТИ́** *межд.*; *уст.* уй алла; **ахти́, ребя́та, пропа́ли** уй алла, егеттәр, һәләк булдыҡ ♦ **не ахти́ како́й** *прост.* әллә ни түгел, әллә ҡайҙа китмәгән; **не ахти́ как** *прост.* насар, яҡшы түгел

**АЦЕТИЛЕ́Н** *м*; *хим.* ацетилен (*углерод менән водородтан торған яныусан төҫһеҙ газ*)

**АЦЕТИЛЕ́НОВЫЙ,** -ая, -ое ацетилен ...ы; **ацетиле́новый за́пах** ацетилен еҫе; **ацетиле́новый цех** ацетилен цехы

**АЦЕТО́Н** *м*; *хим.* ацетон

**АЦЕТО́НОВЫЙ,** -ая, -ое ацетон ...ы; **ацето́новая смесь** ацетон ҡушылмаһы; **ацето́новый за́пах** ацетон еҫе

**АЦИДОФИЛИ́Н** *м* ацидофилин (*махсус бактериялар ярҙамында әсетелгән һөт*)

**АЦТЕ́КИ** *мн.* (*ед.* **ацте́к** *м*) ацтектар (*Мексикалағы индеецтар*)

**АШУ́Г** *м* ашуғ (*Кавказ халыҡтарында халыҡ шағиры йәки йырсыһы*)

**АЭРА́РИЙ** *м* аэрарий (*һауа ваннаһы алыу өсөн яраҡлаштырылған майҙан*)

**АЭРО́БНЫЙ,** -ая, -ое аэроб; **аэро́бные бакте́рии** аэроб бактериялар

**АЭРО́БЫ** *мн.* (*ед.* **аэроб** *м*); *биол.* аэробтар (*ирекле кислород булған шарттарҙа ғына тереклек итә алған организмдар*)

**АЭРОВОКЗА́Л** *м* аэропорт вокзалы, аэровокзал; **зда́ние аэровокза́ла** аэровокзал бинаһы

**АЭРОДИНА́МИКА** *ж* аэродинамика (*һауаның, газдарҙың хәрәкәте, шулай уҡ газдарҙың үҙ тирәһендәге есемдәргә тәьҫире тураһындағы фән*)

**АЭРОДИНАМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** аэродинамик; **аэродинами́ческая труба́** аэродинамик торба **2.** аэродинамика ...ы; **аэродинами́ческая лаборато́рия** аэродинамика лабораторияһы

**АЭРОДРО́М** *м* аэродром; **вое́нный аэродро́м** хәрби аэродром; **стро́ить аэродро́м** аэродром төҙөү

**АЭРОДРО́МНЫЙ,** -ая, -ое аэродром ...ы; **аэродро́мная площа́дка** аэродром майҙаны

**АЭРОЗО́ЛЬ** *м*; *спец.* аэрозоль (*газ средаһында ваҡ ҡына ҡаты һәм шыйыҡ өлөшсәләрҙән торған дисперслы система*)

**АЭРОЗО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аэрозоль ...ы, аэрозолле; **аэрозо́льная устано́вка** аэрозоль етештереү ҡоролмаһы; **аэрозо́льные распыли́тели** аэрозолле һиптергестәр

**АЭРОЛИ́Т** *м*; *астр.* аэролит (*йыһан киңлегенән Ергә төшкән таш масса*; *таш метеорит*)

**АЭРОКЛУ́Б** *м* аэроклуб (*авиаспорт менән шөғөлләнеүселәрҙе берләштереүсе ойошма*)

**АЭРО́ЛОГ** *м* аэролог (*аэрология буйынса белгес*)

**АЭРОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** аэрологик; **аэрологи́ческие наблюде́ния** аэрологик күҙәтеүҙәр **2.** аэрология ...ы; **аэрологи́ческая ста́нция** аэрология станцияһы

**АЭРОЛО́ГИЯ** *ж* аэрология (*атмосфераның юғары ҡатламдарының физик, химик һ.б. үҙенсәлектәрен өйрәнгән фән*)

**АЭРОМЕХА́НИКА** *ж* аэромеханика (*газға оҡшаш мөхиттә тигеҙлек һәм хәрәкәт ҡанундарын, был мөхиттең ундағы ҡаты есемдәргә механик тәьҫирен өйрәнгән тармаҡ*)

**АЭРОНАВИГАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое аэронавигация ...ы; **аэронавигацио́нное обору́дование** аэронавигация ҡорамалдары

**АЭРОНАВИГА́ЦИЯ** *ж* аэронавигация (*осоусы аппараттарҙы билдәле юлдан йөрөтөү тураһындағы фән*), һауа навигацияһы

**АЭРОНА́ВТ** *м*; *книжн.* һауала осоусы, аэронавт

**АЭРОНА́ВТИКА** *ж* һауала осоу эше, аэронавтика

**АЭРОПЛА́Н** *м* осҡос, аэроплан

**АЭРОПО́РТ** *м* аэропорт; **аэропо́рт Уфы́** Өфө аэропорты

**АЭРОСА́НИ** *только мн.* аэросана

**АЭРОСТА́Т** *м* аэростат, осоусы шар

**АЭРОСТА́ТИКА** *ж* аэростатика (*газдарҙағы тигеҙлек ҡануны тураһындағы тәғлимәт*)

**АЭРОСТАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое аэростатик; **аэростати́ческие наблюде́ния** аэростатик күҙәтеүҙәр

**АЭРОСТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое аэростат ...ы; **аэроста́тные стро́пы** аэростат арҡандары

**АЭРОСЪЁМКА** *ж см.* **аэрофотосъёмка**

**АЭРОФОТОГРА́ФИЯ** *ж* аэрофотография (*фотографияның осоусы аппаратурала фотоға төшөрөп алыу теорияһын һәм практикаһын эсенә алған бүлеге*)

**АЭРОФОТОСЪЁМКА** *ж* аэрофотосъёмка (*урынды һауанан фотоға төшөрөү*)

**АЭРОФОТОТОПОГРА́ФИЯ** *ж* аэрофототопография (*урынды һауанан фотоға төшөргән материалдар буйынса топографик карталар эшләү юлдарын өйрәнгән фән*)

# Б

**Б** *частица см.* **бы**

**БА** *межд.*; *разг.* бәй, абау, бәрәкәт, атаҡ; **ба, как глубоко́!** атаҡ, ҡайһылай тәрән!; **ба, кого́ я ви́жу!** бәй, кемде күрәм мин!

**БА́БА I** *ж* **1.** *уст.* крәҫтиән ҡатыны, ауыл ҡатыны **2.** *прост.* (*жена*) ҡатын, бисә **3.** *прост.* (*женщина*) ҡатын, ҡатын кеше **4.** *разг.*, *презр.* (*о слабом, нерешительном мужчине*) бисәкәй **5.** *разг.* (*старуха, бабушка*) әбей; **жи́ли-бы́ли дед да ба́ба** *фольк.* борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән, ти ♦ **ка́менная ба́ба** *археол.* тораташ; **сне́жная ба́ба** ҡар бабай

**БА́БА II** *ж*; *спец.* свай туҡмағы, свай ҡаҡҡыс; **чугу́нная ба́ба** суйын свай туҡмағы

**БА́БА III** *ж* аҡ күмәс ♦ **ро́мовая ба́ба** ромлы күмәс

**БАБА́Х** *межд.* шарт-шорт, шарт та шорт, гөрҫ

**БАБА́ХАТЬ** *несов. см.* **баба́хнуть**

**БАБА́ХНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*издать сильный звук*) шарт (гөрҫ) итеп ҡалыу; (атыу) гөрһөлдәү; **баба́хнуть из пу́шки** пушканан гөрҫ итеп атып ебәреү **2.** *кого-что* (*с силой ударить*) ныҡ итеп (ҡаты итеп) һуғыу (тондороу, ҡундырыу); **баба́хнуть по спине́** *кого-нибудь кемдеңдер* арҡаһына бик ныҡ итеп һуғыу

**БАБА́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шап итеп (гөрҫ итеп) барып төшөү

**БАБА́ШКА** *ж*; *типогр.* бабашка (*хәреф йыйғанда буш урындарҙы тултыра торған шаҡмаҡ*)

**БА́БА-ЯГА́** *ж*; *фольк.* убырлы ҡарсыҡ, мәскәй әбей

**БАББИ́Т** *м*; *тех.* баббит (*подшипниктар эсенә ҡойола торған ҡурғаш, баҡыр һәм һөрмә иретмәһе*)

**БАББИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое баббит …ы; **баббитный заво́д** баббит заводы

**БАББИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** баббит; **баббитовое произво́дство** баббит етештереү **2.** баббиттан яһалған; **баббитовый подши́пник** баббиттан яһалған подшипник

**БА́БИЙ,** -ья, -ье бисәләр …ы; **ба́бий плато́к** бисәләр яулығы ♦ **ба́бье ле́то** әбейҙәр сыуағы; **ба́бьи ска́зки** *презр.* буш һүҙ, уйҙырма

**БА́БКА I** *ж* **1.** (*бабушка*) ҡартәсәй, өләсәй **2.** *прост.* (*старая женщина*) әбей, инәй **3.** *уст.* (*повивальная бабка*) кендек инәһе (әбейе), кендәкәй

**БА́БКА II** *ж* **1.** *анат.* (*надкопытный сустав ноги у животных*) бәкәл, йәкәл, бәкәл (йәкәл) һөйәге **2.** (*кость для игры*) ашыҡ, йәкәл, өнтәй; **игра́ть в ба́бки** ашыҡ уйнау

**БА́БКА III** *ж*; *уст.* һоҫлан, шәпкә, ҡырлыҡ; **ба́бка льна** етен һоҫланы; **ста́вить снопы́ в ба́бки** көлтәләрҙе һоҫланға ҡуйыу

**БА́БКА IV** *ж* (*название узла некоторых металлорежущих или деревообрабатывающих станков*) ҡыҫҡыс

**БА́БНИК** *м*; *разг.*, *презр.* йөрөмтәл (аҙғын) ир-ат

**БА́БНИЧАТЬ** *несов.* **1.** *прост.* йомшаҡлыҡ күрһәтеү **2.** *прост.* йөрөмтәл булыу, бисәләр артынан сабыу **3.** *уст.* кендек инәһе булып йөрөү

**БА́БОЧКА** *ж* **1.** күбәләк; **ночны́е ба́бочки** төнгө күбәләктәр **2.** *разг.*, *перен.* (*галстук в виде банта*) күбәләк; **носи́ть ба́бочку** күбәләк тағыу

**БА́БУШКА** *ж* **1.** (*мать отца, матери*) ҡартәсәй, өләсәй **2.** (*старая женщина*) әбей, инәй ♦ **ба́бушка (ещё) на́двое сказа́ла** булыр-булмаҫы билдәһеҙ, икеле-микеле, боҙға яҙған

**БАГА́Ж** *м* **1.** багаж, йөк; **ручно́й бага́ж** ҡул багажы, ҡул йөгө; **сдать в бага́ж** багажға тапшырыу; **отпра́вить багажо́м** багаж менән ебәреү **2.** *перен.* (*запас сведений, знаний*) белем, белем байлығы (хазинаһы)

**БАГА́ЖНИК** *м* багажник; **бага́жник велосипе́да** велосипед багажнигы; **положи́ть чемода́н в бага́жник автомоби́ля** сумаҙанды автомобиль багажнигына һалыу

**БАГА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое багаж …ы; **бага́жный ваго́н** багаж вагоны; **бага́жная квита́нция** багаж квитанцияһы

**БАГЕ́Т** *м* багет (*кәрниз һәм рамдар яһау өсөн ҡулланылған биҙәкле йәки һырлы, тар йоҡа таҡта*)

**БАГЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** багет …ы; **баге́тная мастерска́я** багет оҫтаханаһы **2.** багет, багеттан яһалған; **баге́тная ра́ма** багеттан яһалған рам

**БАГЕ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **баге́тный**

**БАГО́Р** *м* багор (*оҙон һаплы осло ырғаҡ*); **рыболо́вный баго́р** балыҡ тота торған багор; **пожа́рный баго́р** янғын (ут) һүндерә торған багор; **зацепи́ть ло́дку багро́м** кәмәне багор менән эләктереп алыу **2.** һалдау (*балыҡ тотоу ҡулайламаһы*)

**БАГО́РНЫЙ,** -ая, -ое багор …ы; **баго́рный крюк** багор ырғағы

**БА́ГРИТЬ** *несов. кого-что* **1.** багор менән сығарыу; **ба́грить ло́дку из воды́** кәмәне багор менән һыуҙан сығарыу **2.** (*ловить рыбу багром*) һалдаулау, һалдау (багор) менән балыҡ тотоу

**БАГРОВЕ́ТЬ** *несов.* ҡыҙарыу, бурлат ҡыҙыл төҫкә инеү; (*о солнце при закате*) байрау; (*о человеке*) ҡыҙара бүртеү; **не́бо багрове́ет** күк йөҙө ҡыҙара; **багрове́ть от гне́ва** асыуҙан ҡыҙара бүртеү

**БАГРО́ВЫЙ,** -ая, -ое сем ҡыҙыл, ҡып-ҡыҙыл, ҡуйы ҡыҙыл; **багро́вое лицо́** ҡып-ҡыҙыл йөҙ; **багро́вое пла́мя** ҡуйы ҡыҙыл ялҡын

**БАГРЯНЕ́ТЬ** *несов.*; *книжн.* **1.** (*виднеться — о чём-л. багряном*) ҡыҙарып тороу (күренеү), алһыуланып күренеү (тороу); **на заре́ не́бо багряне́ет** таң атҡанда күк йөҙө алһыуланып күренә **2.** (*становиться багряным*) ҡыҙарыу, ҡыҙылайыу, алһыуланыу, ҡыҙғылт төҫкә инеү; **оси́нник на́чал багряне́ть** уҫаҡ урманы ҡыҙғылт төҫкә инә башланы

**БАГРЯ́НЕЦ** *м* ҡуйы ҡыҙыл (бурлат ҡыҙыл) төҫ; **клён на́чал покрыва́ться багря́нцем** саған бурлат ҡыҙыл төҫкә инә башланы

**БАГРЯ́НИТЬ** и **БАГРЯНИ́ТЬ** *несов. что* ҡуйы ҡыҙыл төҫкә буяу (мансыу); **лучи́ со́лнца багря́нят верши́ны гор** ҡояш нурҙары тау баштарын ҡыҙыл төҫкә мансый

**БАГРЯ́НЫЙ,** -ая, -ое *см.* **багро́вый**

**БАГУ́ЛЬНИК** *м* һаҙанаҡ (*дарыу үҫемлеге*); **насто́й багу́льника** һаҙанаҡ төнәтмәһе

**БАДА́Н** *м* бадан, монгол сәйе

**БАДМИНТО́Н** *м*; *спорт.* бадминтон; **игра́ть в бадминто́н** бадминтон уйнау

**БАДМИНТОНИ́СТ** *м* бадминтонсы; **кома́нда бадминтони́стов** бадминтонсылар командаһы

**БАДЬЯ́** *ж* ағас күнәк, ҡоҙоҡ күнәге, шахта күнәге; **чугу́нная бадья́** ҡорос күнәк

**БА́ЗА** *ж* **1.** *архит.* нигеҙ, ҡоролма нигеҙе; **ба́за коло́нны** колонна нигеҙе **2.** (*основа, основание чего-л.*) база, нигеҙ, ерлек; **материа́льная ба́за** матди ерлек; **социа́льная ба́за** социаль нигеҙ; **экономи́ческая ба́за** иҡтисади ерлек; **сырьева́я ба́за** сеймал базаһы; **кормова́я ба́за животново́дства** малсылыҡтың аҙыҡ базаһы **3.** (*склад, опорный пункт*) база; **това́рная ба́за** тауар базаһы; **авиацио́нная ба́за** авиация базаһы; **вое́нно-морска́я ба́за** хәрби-диңгеҙ базаһы; **тури́стская ба́за** туристар базаһы

**БАЗА́ЛЬТ** *м*; *геол.* базальт (*вулканик тау тоҡомо*)

**БАЗА́ЛЬТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** базальт ...ы; **база́льтовые за́лежи** базальт ятҡылыҡтары; **база́льтовые ска́лы** базальт ҡаялар **2.** базальт, базальттан яһалған; **база́льтовая осно́ва коло́нны** колоннаның базальттан яһалған нигеҙе

**БАЗА́Р** *м* **1.** баҙар; **колхо́зный база́р** колхоз баҙары; **кни́жный база́р** китап баҙары; **шко́льный база́р** мәктәп баҙары **2.** *перен.*, *разг.* (*шум, крик*) ығы-зығы, шау-шыу, баҙар; **устро́ить база́р** баҙар ҡороу

**БАЗА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баҙар ...ы; **база́рный день** баҙар көнө; **база́рная пло́щадь** баҙар майҙаны **2.** *перен.*, *разг.* әҙәпһеҙ, тупаҫ; **база́рная ру́гань** әҙәпһеҙ һүгенеү

**БАЗИЛИ́КА** и **БАЗИ́ЛИКА** *ж*; *архит.* базилика (*урта быуаттағы төҙөлөш тибы*)

**БАЗИ́РОВАТЬ** *несов. что*, *на чём* нигеҙләү; **бази́ровать промы́шленность на ме́стном сырье́** сәнәғәтте урындағы сеймалға нигеҙләү

**БАЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *на чём* нигеҙләнеү, таяныу; **бази́роваться на факти́ческих материа́лах** фактик материалдарға таяныу **2.** (*размещаться, располагаться*) урынлашыу; **самолёты бази́ровались на но́вом аэродро́ме** самолёттар яңы аэродромда урынлашты

**БА́ЗИС** *м* **1.** *архит.* базис, нигеҙ; **ба́зис коло́нны** колоннаның нигеҙе **2.** *см.* **ба́за** 2; **3.** базис (*билдәле бер йәмғиәттең үҫенә ярашлы сәйәси, хоҡуҡи, әхлаҡи һ.б. ҡануңдары булған етештереү мөнәсәбәттәре*)

**БА́ЗИСНЫЙ,** -ая, -ое базис ...ы; **ба́зисные явле́ния** базис күренештәре

**БА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое база ...ы; **ба́зовое иму́щество** база мөлкәте

**БАИ́Т** и **БЕЙТ** *м*; *лит.* бәйет

**БА́Й** *м* бай

**БАЙ-БА́Й** и **БА́Ю-БА́Й** *межд.* бәү-бәү, бәлли-бәү, әүәй-әүәй; **пора́ бай-ба́й** бәү-бәү итергә ваҡыт

**БАЙБА́К** *м* **1.** (*вид сурка*) һыуыр **2.** *перен.*, *разг.* (*лентяй*) ялҡау, ата ялҡау, нәкәҫ

**БАЙБА́ЧИЙ,** -ья, -ье һыуыр ...ы; **байба́чья нора́** һыуыр өңө

**БАЙДА́РКА** *ж* байдарка (*бер кешелек кәмә*)

**БАЙДА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое байдарка ...ы; **байда́рочное весло́** байдарка ишкәге

**БА́ЙКА I** *ж* байка (*йоҡа кизе-мамыҡ туҡыма*); **бе́лая ба́йка** аҡ байка

**БА́ЙКА II** *ж* лаҡап, мәҙәк; **расска́зывать ба́йки** мәҙәк һөйләү

**БА́ЙКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** байка ...ы; **ба́йковое произво́дство** байка етештереү **2.** байка, байканан тегелгән; **ба́йковое одея́ло** байка одеял; **ба́йковый хала́т** байка халат, байканан тегелгән халат

**БА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое бай ...ы; **ба́йские зе́мли** байҙың ерҙәре

**БА́ЙХОВЫЙ: ба́йховый чай** бөртөк(лө) сәй

**БАК I** *м* (*сосуд*) бак; **нефтяны́е ба́ки** нефть бактары; **бак для воды́** һыу бағы

**БАК II** *м*; *мор.* бак (*пароход палубаһының алғы өлөшө*)

**БАКАЛА́ВР** *м* бакалавр (**1.** *Көнбайыш Европа илдәрендә беренсе ғилми дәрәжә* **2.** *хәҙерге Францияла урта мәктәпте тамамлаған һәм университетҡа инергә хоҡуғы булған уҡыусы*)

**БАКАЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое бакалея ...ы; **бакале́йный това́р** бакалея тауары; **бакале́йный магази́н** бакалея магазины

**БАКАЛЕ́Я** *ж собир.* бакалея (*сәй, шәкәр, кофе, ярма, он кеүек аҙыҡ-түлек*)

**БАКЕЛИ́Т** *м*; *хим.* бакелит (*синтетик ыҫмала*)

**БА́КЕН** *м* бакен (*һыуҙа һай йәки хәүефле урындарҙы күрһәтеп йөҙөп йөрөмәле билге*); **зажига́ть ба́кены** бакендарға ут тоҡандырыу

**БАКЕНБА́РДЫ** *мн.* сикә һаҡалы

**БА́КЕНЩИК** *м* бакенсы, бакен һаҡсыһы

**БАКЛА́ГА** *ж* баклага (*бормаслы ҡалай йәки ағас һауыт*)

**БАКЛАЖА́Н** *м* баклажан (*йәшелсә*)

**БАКЛАЖА́ННЫЙ,** -ая, -ое баклажан ...ы; **баклажа́нная икра́** баклажан икраһы

**БАКЛА́Н** *м* баклан (*һыу ҡошо*)

**БАКЛА́НИЙ,** -ья, -ье баклан ...ы; **бакла́нье гнездо́** баклан ояһы; **бакла́нье яйцо́** баклан йомортҡаһы

**БАКЛУ́ШИ: бить баклу́ши** *разг.* эт һуғарыу, ел ҡыуыу, йөн тибеү

**БАКТЕРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бактерия ...ы; **бактериа́льная кле́тка** бактерия күҙәнәге **2.** бактериялы, бактериаль; **бактериа́льные удобре́ния** бактериялы ашламалар

**БАКТЕРИЗОВА́ТЬ** *несов.* бактериялау; **бактеризова́ть торф** торфты бактериялау; **бактеризова́ть по́чву** тупраҡты бактериялау

**БАКТЕРИЗОВА́ТЬСЯ** *несов.* бактерияланыу

**БАКТЕРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое бактерия ...ы, бактериаль, бактериялы; **бактери́йные препара́ты** бактериялы препараттар

**БАКТЕРИО́З** *м* бактериоз (*үҫемлектәрҙәге йоғошло ауырыу*)

**БАКТЕРИО́ЛОГ** *м* бактериолог (*бактериология белгесе*)

**БАКТЕРИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** бактериология ...ы; **бактериологи́ческая лаборато́рия** бактериология лабораторияһы **2.** бактериологик; **бактериологи́ческое ору́жие** бактериологик ҡорал; **бактериологи́ческая война́** бактериологик һуғыш

**БАКТЕРИОЛО́ГИЯ** *ж* бактериология (*микробиологияның бактерияларҙы өйрәнә торған бүлеге*)

**БАКТЕРИОФА́Г** *м* бактериофаг (*бактерияларҙы иретә һәм юҡҡа сығара торған матдә*)

**БАКТЕРИЦИ́ДНОСТЬ** *ж* бактерицидлыҡ (*микробтарҙы юҡ итеү һәләте*)

**БАКТЕРИЦИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое бактерицид (*микробтарҙы юҡ итергә һәләтле*); **бактерици́дные сы́воротки** бактерицид һыуҙар

**БАКТЕ́РИЯ** *ж* бактерия (*бик бәләкәй бер күҙәнәкле организм*), микроб; **болезнетво́рные бакте́рии** ауырыу тыуҙырыусы бактериялар; **гни́лостные бакте́рии** сереткес бактериялар

**БАЛ** *м* бал (*бейеүҙәр менән үткәрелгән ҙур байрам кисәһе*); **новогоднний бал** Яңы йыл балы ♦ **ко́нчен бал** бөттө-китте, вәссәләм

**БАЛАБА́Н** *м* балабан (*ҡайһы бер Төньяҡ Кавказ халыҡтарында тынлы музыка ҡоралы*)

**БАЛАБО́ЛКА** *разг.* **1.** *ж* (*украшение в виде висящей кисточки, подвеска*) суҡ, сәсәк **2.** *м* и *ж*; *перен.* (*болтун, болтунья*) лығырҙаҡ, лапылдаҡ, тел бисҭәһе, ләстит һатыусы

**БАЛАБО́НИТЬ** *несов.*; *прост.* ләстит һатыу, лаҡылдау

**БАЛАГА́Н** *м* **1.** *уст.* балаган, таҡта аласыҡ; **я́рмарочные балага́ны** йәрминкә балагандары **2.** уйын, тамаша, кәмит (*йәрминкәләрҙә күрһәтелгән*) **3.** *перен.* кәмит, көлкө, мәрәкә; **преврати́ть мероприя́тие в балага́н** сараны кәмиткә әйләндереү

**БАЛАГА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** балаган ...ы; **балага́нное представле́ние** балаган тамашаһы; **балага́нный шут** балаган мәҙәксеһе **2.** *перен.* тупаҫ

**БАЛАГУ́Р** *м*; *разг.* мәрәкәсе, йор һүҙле (кеше), шырмый

**БАЛАГУ́РИТЬ** *несов.*; *разг.* мәрәкәләү, мәрәкә һөйләү; **он весь ве́чер балагу́рил** ул кис буйына мәрәкә һөйләне

**БАЛАЛА́ЕЧНИК** *м* балалайкасы, балалайкала уйнаусы

**БАЛАЛА́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое балалайка ...ы; **балала́ечная струна́** балалайка ҡылы; **балала́ечный орке́стр** балалайка оркестры

**БАЛАЛА́ЙКА** *ж* балалайка; **игра́ть на балала́йке** балалайкала уйнау ♦ **бесстру́нная балала́йка** ярыҡ барабан (*сер тота белмәгән, шаран-яра кеше*)

**БАЛАМУ́Т** *м*; *разг.* баламут, донъя бутаусы, ҡотҡо һалыусы, ҡотҡосо

**БАЛАМУ́ТИТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *что* болғатыу, буръяҡлау, болғансыҡлау; **баламу́тить во́ду** һыуҙы болғансыҡлау **2.** *кого-что*; *перен.* ҡотортоу, донъя бутау; **баламу́тить ребя́т** бала-сағаны ҡотортоу

**БАЛА́НДА** *ж*; *прост.* өйрә; **вари́ть бала́нду** өйрә бешереү

**БАЛА́НС I** *м* **1.** (*равновесие*) баланс, тигеҙлек **2.** *фин.* баланс; **годово́й бала́нс** йыллыҡ баланс; **акти́вный бала́нс** актив баланс; **насси́вный бала́нс** пассив баланс; **торго́вый бала́нс** сауҙа балансы; **бала́нс наро́дного хозя́йства** халыҡ хужалығы балансы; **свести́ бала́нс** баланс сығарыу

**БАЛА́НС II** *м собир.*; *спец.* (*брёвна*) баланс, түмәрсә (*целлюлоза заводтары өсөн әҙерләнгән ҡыҫҡа бүрәнәләр*)

**БАЛАНСИ́Р** *м* балансир (**1.** *цирк. канат өҫтөндә йөрөүсе акробаттың тигеҙлек һаҡлау ҡолғаһы* **2.** *тех. рычагтың бер төрө* **3.** *сәғәттәрҙә маятник хеҙмәтен үтәгән төп регулятор*)

**БАЛА́НСОВЫЙ I,** -ая, -ое *фин.* баланс ...ы; **бала́нсовый отчёт** баланс отчёты

**БАЛА́НСОВЫЙ II,** -ая, -ое *спец.* баланс; **бала́нсовая древеси́на** баланс ағас

**БАЛАХО́Н** *м*; *разг.* балахон (*килешһеҙ тегелгән, киң оҙон кейем*)

**БАЛБЕ́С** *м*; *разг.*, *презр.* аңра, миңрәү, тинтәк, һиңмай

**БАЛДА́** **1.** *ж*; *уст.* (*большой тяжёлый молот*) балға; **разбива́ть ка́мень желе́зной балдо́й** тимер балға менән таш ватыу **2.** *м* и *ж*; *прост.*, *бран.* алйот, аңра

**БАЛДАХИ́Н** *м* балдахин (*түбәләп эшләнгән сәсәкле сымылдыҡ*)

**БАЛЕРИ́НА** *ж* балерина, балетта бейеүсе ҡатын-ҡыҙ

**БАЛЕ́Т** *м* балет; **башки́рский бале́т** башҡорт балеты; **класси́ческий бале́т** классик балет; **арти́ст бале́та** балет артисы

**БАЛЕТМЕ́ЙСТЕР** *м* балетмейстер

**БАЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое балет ...ы; **бале́тное иску́сство** балет сәнғәте; **бале́тная шко́ла** балет мәктәбе

**БАЛЕТОМА́Н** *м* балетоман (*балет яратыусы*)

**БАЛЕТОМА́НИЯ** *ж* балетомания (*балет менән мауығыу*)

**БА́ЛКА I** *ж* (*брус*) урҙа, өрләк, матса, бағана; **желе́зная ба́лка** тимер урҙа

**БА́ЛКА II** *ж* (*овраг*) һыҙа, үҙән, тар күл; **лесна́я ба́лка** урман һыҙаһы

**БАЛКАНИ́СТ** *м* балканист (*Балҡан ярымутрауында йәшәгән халыҡтарҙы өйрәнеүсе; шулар буйынса белгес*)

**БАЛКА́РСКИЙ,** -ая, -ое балҡар ...ы; **балка́рская литерату́ра** балҡар әҙәбиәте

**БАЛКА́РЦЫ** и **БАЛКА́РЫ** *мн.* балҡарҙар, балҡар халҡы // *ед.* **балка́рец** и **балка́р** *м* балҡар ир-аты; **балка́рка** *ж* балҡар ҡатын-ҡыҙы

**БАЛКО́Н** *м* балкон; **украша́ть балко́н цвета́ми** балконды сәскәләр менән биҙәү; **пе́рвый ряд балко́на** *театр.* балкондың беренсе рәте

**БАЛКО́ННЫЙ,** -ая, -ое балкон ...ы; **балко́нная дверь** балкон ишеге

**БАЛЛ** *м* **1.** (*единица измерения силы каких-л. явлений*) балл; **си́ла ве́тра в шесть ба́ллов** елдең көсө алты балл; **землетрясе́ние в пять ба́ллов** биш баллыҡ ер тетрәү **2.** (*оценка в школе, в спорте*) балл, билдә; **ко́нкурсный балл** конкурс балы; **не набра́ть ба́ллов** балл йыя алмау

**БАЛЛА́ДА** *ж* баллада (**1.** *легенда йәки әкиәт сюжетына яҙылған шиғри әҫәр* **2.** *музыкаль әҫәр*)

**БАЛЛА́ДНЫЙ,** -ая, -ое баллада ...ы

**БАЛЛА́СТ** *м* **1.** балласт, ауырлыҡ, йөк (*тейешле тәрәнлеккә төшөрөү өсөн карапҡа, осоу бейеклеген һаҡлау өсөн аэростатҡа һалынған йөк*) **2.** *ж.-д.* балласт (*өҫтөнә шпал һалыу өсөн ергә түшәлгән ҡырсын таш йәки ҡом*) **3.** *перен.* кәрәкмәгән артыҡ нәмә, артыҡ йөк

**БАЛЛАСТИ́РОВАТЬ** *несов.*; *ж.-д.* балласт түшәү

**БАЛЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое балласт ...ы; **балла́стная систе́ма корабля́** карараптың балласт системаһы; **балла́стный по́езд** балласт поезы

**БАЛЛА́СТОВЫЙ,** -ая, -ое балласт ...ы

**БАЛЛИ́СТИК** *м* баллистика белгесе, баллистик

**БАЛЛИ́СТИКА** *ж*; *воен.* баллистика (*артиллерия тубы, йәҙрәһе, мина, авиабомба һ.б. хәрәкәте тураһындағы фән*); **вну́тренняя балли́стика** эске баллистика; **вне́шняя балли́стика** тышҡы баллистика

**БАЛЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое баллистик; **баллисти́ческая ракéта** баллистик ракета

**БА́ЛЛОВЫЙ,** -ая, -ое балл менән баһаланған (иҫәпләнгән, үлсәнгән); **ба́лловая характери́стика ве́тра** елдең балл менән иҫәпләнгән көсө

**БАЛЛО́Н** *м*; *в разн. знач.* баллон; **балло́н с кислоро́дом** кислород баллоны; **балло́н аэроста́та** аэростат баллоны

**БАЛЛОТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* һайлау, тауыш биреү, тауышҡа ҡуйыу; **баллоти́ровать предложе́ние** тәкдимде тауышҡа ҡуйыу

**БАЛЛОТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* һайланыу, тауышҡа ҡуйылыу; **баллоти́роваться в депута́ты** депутатлыҡҡа һайланыу

**БАЛЛОТИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое һайлау ...ы; **баллотиро́вочный бюллете́нь** һайлау бюллетене

**БА́ЛЛЬНЫЙ,** -ая, -ое балл ...ы; **ба́лльная систе́ма** балл системаһы

**...БА́ЛЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендә беренсе яртыһы һан менән килгән ҡушма һүҙҙәрҙең "баллы" мәғәнәһен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.,* **пятиба́лльная систе́ма оце́нки зна́ний** белем кимәлен баһалауҙа биш баллы система

**БАЛО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое иркә, иркәләп боҙолған; **бало́ванный ребёнок** ныҡ иркәләүҙән боҙолған бала

**БАЛОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* иркәләтеү, иркәләтеп боҙоу, ҡотортоу, яман өйрәтеү, шаштырыу, уҙындырыу; **балова́ть дете́й** балаларҙы иркәләтеп боҙоу **2.** *прост.* шаярыу; **ребёнок балу́ет** бала шаяра

**БАЛОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*играть*) шаярыу, ҡотороу; **ребёнок балу́ется** бала шаяра; **не балу́йся** шаярма **2.** *чем* (*заниматься ради удовольствия*) шаярыу, шаярып эшләү, уйнау; **балу́юсь табако́м** тәмәке тартҡылайым; **балова́ться с огнём** ут менән уйнау

**БА́ЛОВЕНЬ** *м*; *разг.* **1.** (*любимчик*) иркә **2.** (*шутник*) шаян, шуҡ ♦ **ба́ловень судьбы́** яҙмышы бәхетле

**БАЛОВЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* шуҡ, шаян; **баловли́вый ма́льчик** шаян малай

**БАЛОВНИ́К** *м* и **БАЛОВНИ́ЦА** *ж*; *разг.* шаян, шуҡ

**БАЛОВНО́Й,** -ая, -ое *прост.* шаян, шуҡ; **баловно́й ребёнок** шуҡ бала

**БАЛОВСТВО́** *с*; *разг.* **1.** (*потворство*) артыҡ иркәләү, уҙындырыу, шаштырыу **2.** (*шалость*) шаянлыҡ, шуҡлыҡ

**БАЛЫ́К** *м* ҡыҙыл балыҡ (*ҡаҡланған ҡыҙыл балыҡтың һырт ите*)

**БАЛЬЗА́КОВСКИЙ: бальза́ковский во́зраст** Бальзак йәше (*ҡатын-ҡыҙҙың утыҙ менән ҡырҡ араһындағы йәше*)

**БАЛЬЗА́М** *м* **1.** бәлзәм (*ыҫмала, эфир майҙары булған үҫемлек һуты һәм дарыу үләндәре төнәтмәһе йәки майы*) **2.** *перен.* (*средство утешения*) йыуаныс, күңел аҙығы

**БАЛЬЗАМИ́Н** *м* бохар ҡынаһы, ҡына гөлө

**БАЛЬЗАМИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* бәлзәмләү, бәлзәм менән эшкәртеү

**БАЛЬЗАМИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **бальзами́ровать**

**БАЛЬЗАМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое бәлзәм бирә торған, бәлзәмле; **бальзами́ческая пи́хта** бәлзәм бирә торған аҡ шыршы; **бальзами́ческие вещества́** бәлзәмле матдәләр

**БАЛЬЗА́МНЫЙ,** -ая, -ое бәлзәм ...ы; **бальза́мное де́рево** бәлзәм ағасы

**БАЛЬНЕО́ЛОГ** *м* бальнеолог, бальнеология белгесе

**БАЛЬНЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое бальнеология ...ы, бальнеологик; **бальнеологи́ческий куро́рт** бальнеология курорты

**БАЛЬНЕОЛО́ГИЯ** *ж* бальнеология (*минераль һыуҙарҙың сығышын, физик һәм химик составын тикшереп, улар менән дауаланыу ысулдарын өйрәнә торған фән*)

**БА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **бал**; **ба́льный костю́м** бал костюмы

**БАЛЮСТРА́ДА** *ж* балюстрада (*балкон йәки баҫҡыс яндауырындағы фигуралап яһалған рәшәткә*)

**БАЛЯ́СИНА** *ж* балясина (*баҫҡыс яндауырындағы йәки ҡоймалағы фигуралап яһалған текмә*)

**БАЛЯ́СНИК I** *м* балясник (*төҙөлөш материалы*)

**БАЛЯ́СНИК II** *м*; *прост.* мәҙәксе, мәрәкәсе

**БАЛЯ́СНИЧАТЬ** *несов.*; *прост.* шаярып һөйләшеү, мәрәкәләү, хәбәр һатыу

**БАЛЯ́СЫ: баля́сыточи́ть** ләстит һатыу

**БАМБУ́К** *м* бамбук

**БАМБУ́КОВЫЙ,** -ая, -ое бамбук ...ы; **бамбу́ковая трость** бамбук таяғы; **бамбу́ковые за́росли** бамбук урманлығы ♦ **бамбу́ковое положе́ние** *прост., шутл.* ауыр (ҡыйын, уңайһыҙ) хәл

**БА́МПЕР** *м* бампер (*автомобилдәрҙә бәрелеү көсөн кәметә торған махсус ҡулайлама*)

**БАНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* күп сәйнәлгән (тапалған) һүҙ, иҫкергән фекер

**БАНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күп сәйнәлгән, тапалған, иҫкергән; **бана́льный сюже́т** тапалған сюжет

**БАНА́Н** *м* банан (*тропик үҫемлек һәм уның емеше*)

**БАНА́НОВЫЙ,** -ая, -ое банан ...ы; **бана́новый лист** банан япрағы; **бана́новая ро́ща** банан урманы

**БА́НДА** *ж* банда, шайка; **диверсио́нная ба́нда** диверсия бандаһы; **ба́нда граби́телей** талаусылар (юлбаҫарҙар) бандаһы

**БАНДА́Ж** *м* бандаж (**1.** *эсте күтәртеү йәки берәй ағзаны нормаль хәлдә тотоу өсөн кейелә торған махсус яҫы билбау* **2.** *тех. машина частарына, вагон тәгәрмәстәренә һ.б. кейҙерелә торған металл туғын, шин*)

**БАНДА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое бандаж ...ы; **банда́жная мастерска́я** бандаж оҫтаханаһы

**БАНДЕРО́ЛЬ** *ж* бандероль; **отпра́вить бандеро́ль** бандероль ебәреү

**БАНДЕРО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бандероль; **бандеро́льное отправле́ние** бандероль менән ебәреү

**БА́НДЖО** *с нескл.* банджо (*Америка негрҙарының сиртеп уйнай торған музыка ҡоралы*)

**БАНДИ́Т** *м* бандит, ҡоралл юлбаҫар, башкиҫәр

**БАНДИТИ́ЗМ** *м* бандитизм, бандитлыҡ, юлбаҫарлыҡ

**БАНДИ́ТСКИЙ,** -ая, -ое бандит ...ы; **банди́тская ша́йка** бандит шайкаһы

**БАНДУ́РА** *ж* бандура (*украиндарҙың сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы*)

**БАНДУРИ́СТ** *м* бандурасы; **капе́лла бандури́стов** бандурасыларҙың капеллаһы

**БАНК** *м* **1.** банк; **госуда́рственный банк** дәүләт банкы(һы) **2.** банк (*кәрт уйынының бер төрө*; *кәрт уйынында уртаға һала торған аҡса*)

**БА́НКА I** *ж* **1.** банка; **консе́рвная ба́нка** консерва банкаһы; **ба́нка для варе́нья** ҡайнатма өсөн банка **2.** *обычно мн.* **ба́нки**; *мед.* банка һалыу (ултыртыу)

**БА́НКА II** *ж*; *мор.* һайлыҡ, һай урын

**БАНКЕ́Т I** *м* банкет, тантаналы мәжлес; **устро́ить банке́т** банкет яһау (ойоштороу)

**БАНКЕ́Т II** *м*; *тех.* банкет (*берәй ҡоролманы емерелеүҙән һаҡлау өсөн һалынған тупраҡ йәки таш өйөмө*)

**БАНКЕ́ТКА** *ж* банкетка (*артһыҙ йомшаҡ диван*)

**БАНКЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое банкет ...ы; **банке́тный зал** банкет залы

**БАНКИ́Р** *м* банкир, банк хужаһы

**БАНКИ́РСКИЙ,** -ая, -ое банкир ...ы; **банки́рская конто́ра** банкир контораһы

**БАНКНО́ТЫ** *мн.* (*ед.* **банкно́т** *м* и **банкно́та** *ж*); *фин.* банкнот (**1.** *дәүләт банкыһы тарафынан сығарылып, аҡса урынына йөрөй торған билет* **2.** *эмиссион банкылар тарафынан сығарылған ҡағыҙ аҡса*)

**БА́НКОВСКИЙ,** -ая, -ое банк ...ы; **ба́нковский слу́жащий** банк хеҙмәткәре; **ба́нковская систе́ма** банк системаһы

**БА́НКОВЫЙ,** -ая, -ое банк ...ы; **ба́нковое де́ло** банк эше

**БАНКРО́Т** *м* банкрот (**1.** *бурысҡа батып, бөлгән кеше* **2.** *күсм. шәхси тормошонда, хеҙмәтендә бәхетһеҙлеккә дусар булған кеше*)

**БАНКРО́ТСТВО** *с*; *прям., перен.* банкротлыҡ, бөлгөнлөк; **полити́ческое банкро́тство** сәйәси банкротлыҡ

**БА́ННЫЙ,** -ая, -ое мунса …ы; **ба́нный день** мунса көнө; **ба́нное полоте́нце** мунса таҫтамалы ♦ **как ба́нный лист (приста́ть)** һағыҙаҡ кеүек йәбешеү, йәнгә тейеү, теңкәгә тейеү

**БАНТ** *м* бант; **приколо́ть бант** бант тағыу; **завяза́ть бант** бант тағыу

**БА́НТУ** *мн. нескл.* **1.** (*группа народов*) банту, бантуҙар **2.** (*семья языков*) банту (*Көньяҡ һәм Урта Африка халыҡтарының телдәр ғаиләһе*)

**БА́НЩИК** *м* и **БА́НЩИЦА** *ж* мунсасы, мунса хеҙмәткәре

**БА́НЯ** *ж* мунса; **коммуна́льная ба́ня** коммуналь мунса; **мы́ться в ба́не** мунсала йыуыныу ♦ **бе́лая ба́ня** аҡ мунса; **чёрная ба́ня** ҡара мунса; **зада́ть ба́ню** *кому* кәрәген биреү, бик ҡаты әрләү, ҡыҙҙырыу

**БАОБА́Б** *м* баобаб (*тропик ағас*)

**БАПТИ́ЗМ** *м* баптизм (*христиан диненең айырым бер сектаһы*)

**БАПТИ́СТ** *м* и **БАПТИ́СТКА** *ж* баптист

**БАПТИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое баптист …ы, баптистар …ы; **бапти́стская общи́на** баптистар йәмғиәте

**БАР I** *м* бар (*ҙур булмаған ресторан*)

**БАР II** *м*; *метеор.* бар (*атмосфера баҫымын үлсәү берәмеге*)

**БАР III** *м*; *мор.* бар (*йылға йәки диңгеҙ яр буйындағы һайлыҡ*)

**БАР IV** *м*; *горн.* бар (*тау комбайнының бер өлөшө*)

**БАРАБА́Н** *м* **1.** барабан; **оркестро́вый бараба́н** оркестр барабаны; **пионе́рский бараба́н** пионер барабаны; **боево́й бараба́н** хәрби барабан; **бить в бараба́н** барабан һуғыу (ҡағыу) **2.** барабан (*төрлө машина һәм механизмдарҙа эсе ҡыуыш цилиндр*); **бараба́н молоти́лки** ашлыҡ һуҡҡыстың барабаны; **бараба́н револьве́ра** револьвер барабаны

**БАРАБА́НИТЬ** *несов.* **1.** барабан ҡағыу (һуғыу) **2.** (*дробно стучать*) тыҡ-тыҡ иттереү, тыҡылдатыу; **бараба́нить по стеклу́** тәҙрә тыҡылдатыу **3.** *что* и *без доп.*; *разг.* насар уйнау, дыңғырлатыу; **бараба́нить на роя́ле** рояль дыңғырлатыу

**БАРАБА́ННЫЙ,** -ая, -ое барабан …ы; **бараба́нные па́лочки** барабан таяҡсалары; **бараба́нный бой** барабан тауышы ♦ **бараба́нная перепо́нка** *анат.* ҡолаҡ ярыһы

**БАРАБА́НЩИК** *м* и **БАРАБА́НЩИЦА** *ж* барабансы, барабан ҡағыусы

**БАРА́К** *м* барак; **рабо́чий бара́к** эшселәр бараҡы

**БАРА́Н** *м* **1.** тәкә, һарыҡ тәкәһе; **годова́лый бара́н** бер йәшлек тәкә; **племенно́й бара́н** тоҡомло һарыҡ тәкәһе; **холощёный баран** бестерелгән (көйҙөрөлгән) тәкә **2.** ҡырағай һарыҡ, ҡырағай һарыҡ тәкәһе ♦ **как бара́н на но́вые воро́та (уста́виться)** бер ни аңламай, мәғәнәһеҙ текләп тороу (ҡарау); ябалаҡ кеүек ҡарау

**БАРА́НИЙ,** -ья, -ье **1.** тәкә …ы; **бара́ньи рога́** тәкә мөгөҙө **2.** һарыҡ тиреһенән тегелгән; **бара́ний тулу́п** һарыҡ тиреһенән тегелгән толоп ♦ **в бара́ний рог согну́ть (скрути́ть)** *кого кемделер* бөгөп алыу, баш эйҙереү

**БАРА́НИНА** *ж* һарыҡ (ҡуй) ите; **жа́реная бара́нина** ҡыҙҙырылған һарыҡ (ҡуй) ите

**БАРА́НКА** *ж* **1.** керәндил; **све́жая бара́нка** яңы бешкән керәндил **2.** *перен.*, *прост.* баранка (*автомобиль руле*); **сесть за бара́нку** баранка артына ултырыу; **крути́ть бара́нку** баранка әйләндереү

**БАРАХЛИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* насар эшләү; **мото́р барахли́т** мотор насар эшләй

**БАРАХЛО́** *с собир.*; *прост.* иҫке-моҫҡо, алам-һалам, яраҡһыҙ ваҡ-төйәк

**БАРАХО́ЛКА** *ж*; *прост.* барахолка (*иҫке-моҫҡо, алам-һалам һатҡан урын*)

**БАРА́ХТАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* тыбырсыныу, тулау, шаптырлау; **бара́хтаться в воде́** һыуҙа шаптырлау

**БАРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое барак тибындағы, барак …ы; **бара́чная постро́йка** барак тибындағы төҙөлөш

**БАРА́ШЕК** *м* **1.** *уменьш.-ласк.* *от* **бара́н** һарыҡ бәрәсе (бәрәне) **2.** (*выделанная баранья шкурка*) бәрәс (бәрән) тиреһе, илтер; **ша́пка из бара́шка** илтер бүрек **3.** *мн.* **бара́шки** (*волны*) тулҡын ялы (күбеге) **4.** *мн.* **бара́шки** (*облака*) шекәрә болоттар **5.** (*гайка*) ике тотҡалы гайка

**БАРА́ШКОВЫЙ,** -ая, -ое илтер, бәрәс тиреһенән тегелгән; **бара́шковый воротни́к** илтер яға

**БАРБАРИ́С** *м* барбарис (*ҡыуағы һәм емеше*)

**БАРБАРИ́СОВЫЙ,** -ая, -ое барбарис …ы; **барбари́совый куст** барбарис ҡыуағы; **барбари́совое варе́нье** барбарис ҡайнатмаһы

**БАРБО́С** *м* барбос (*йорт эте*)

**БАРД** *м* **1.** бард (*боронғо кельттарҙа йырсы-шағир*) **2.** *уст.* шағир

**БАРДА́** *ж* төпрә (*шарап, һыра һ.б. ҡойоу өсөн ҡулланылып, аҫаҡ төбөнә ултырған ҡалдыҡ*)

**БАРЕ́Ж** *м*; *уст.* бареж (*үтә күренмәле еңел туҡыма*); **бе́лый баре́ж** аҡ бареж

**БАРЕ́ЖЕВЫЙ,** -ая, -ое; *уст.* бареж; **баре́жевое пла́тье** бареж күлдәк

**БАРЕЛЬЕ́Ф** *м* барельеф (*ҡабартып төшөрөлгән скульптура һүрәте*)

**БАРЕЛЬЕ́ФНЫЙ,** -ая, -ое барельеф …ы, барельефлы; **барелье́фное изображе́ние** барельеф һүрәт

**БАРЕ́ТКИ** *мн.* (*ед.* **баре́тка** *ж*); *прост.* баретка (*сепрәктән тегелгән еңел аяҡ кейеме*); **бе́лая баре́тка** аҡ баретка

**БАРЕ́ТТЕР** *м* бареттер (*электр приборы*)

**БА́РЖА** и **БАРЖА́** *ж* баржа; **грузи́ть зерно́ на ба́ржу** баржаға иген тейәү

**БА́РЖЕВЫЙ** и **БАРЖЕВО́Й,** -ая, -ое баржа(лар) …ы; **ба́ржевый кана́т** баржа канаты; **ба́ржевый карава́н** баржалар каруаны

**БА́РИЕВЫЙ,** -ая, -ое барий …ы, барийлы

**БА́РИЙ** *м* барий (*химик элемент, металл*)

**БА́РИН** *м*; *уст.* барин, алпауыт (**1.** *помещик, дворян, баяр* **2.** *әфәнде, хужа* **3.** *күсм. эшләргә яратмаған кеше, аҡһөйәк*) ♦ **сиде́ть ба́рином** ҡул ҡаушырып ултырыу (*дөйөм эшкә ҡатнашмау*)

**БАРИ́Т** *м* барит (*буяу, резина, ҡағыҙ етештереүҙә һ.б. сәнәғәттә киң ҡулланылған минерал*)

**БАРИТО́Н** *м* баритон (**1.** *бас менән тенор араһындағы ирҙәр тауышы; шундай тауыш менән йырлаған кеше* **2.** *тынлы музыка ҡоралының бер төрө*)

**БАРИТОНА́ЛЬНЫЙ** и **БАРИТО́ННЫЙ,** -ая, -ое баритональ, баритонға яҡын; **баритона́льный бас** баритональ бас; **барито́нная па́ртия** баритон партияһы

**БА́РИЧ** *м*; *уст., разг.* барин малайы, байбетсә

**БАРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *метеор.* бар …ы; **бари́ческий (барометри́ческий) градие́нт** бар (барометрик) градиент(ы), баҫым градиенты

**БАРК** *м*; *мор.* барк (*елкәнле судноның бер төрө*)

**БА́РКА** *ж* барка (*ағас баржа*)

**БАРКАРО́ЛА** *ж*; *муз.* баркарола (*Венеция кәмәселәренең йыры һәм шул стилдә яҙылған музыкаль әҫәр*)

**БАРКА́С** *м* баркас (**1.** *күп ишкәкле ҙур кәмә* **2.** *портта йөк ташый торған үҙе йөрөмәле кәмә*)

**БАРКА́СНЫЙ,** -ая, -ое баркас …ы

**БА́РМЫ** *мн.* барм (*батша кейеме*)

**БАРО́ГРАФ** *м* барограф (*атмосфера баҫымының үҙгәрешен яҙып бара торған прибор*)

**БАРОКА́МЕРА** *ж* барокамера (*яһалма рәүештә юғары йәки түбән барометрик баҫым барлыҡҡа килтерә торған герметик камера*)

**БАРО́ККО** *с нескл.* барокко (*XVI–XVIII бб. Көнбайыш Европа архитектураһында һәм скульптураһында булған ныҡ семәрле декоратив стиль*)

**БАРО́МЕТР** *м* барометр (**1.** *атмосфера баҫымын үлсәй торған прибор* **2.** *күсм. эшхәлдең барышын сағылдырған күрһәткес*)

**БАРОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое барометрик; **барометри́ческие да́нные** барометрик мәғлүмәттәр

**БАРО́Н** *м* барон (*Көнбайыш Европала графтан түбән дворянлыҡ титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше*)

**БАРОНЕ́ССА** *ж* барондың ҡатыны, барондың ҡыҙы

**БАРОНЕ́Т** *м* баронет (*Англияла дворян титулы һәм шул титулды йөрөткән кеше*)

**БАРО́НСКИЙ,** -ая, -ое барон; **баро́нский ти́тул** барон титулы

**БАРО́НСТВО** *с* баронлыҡ, барон булыу

**БА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое барка …ы; **ба́рочный тёс** барка таҡтаһы; **ба́рочный я́корь** барка якоры

**БАРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое барокко …ы; **баро́чный стиль** барокко стиле; **баро́чная жи́вопись** барокко стилендәге живопись

**БАРРА́Ж** *м*; *ав.* барраж (*ҡорос тростар менән беркетелгән аэростаттарҙан торған һауалағы тотҡарлыҡ*)

**БАРРАЖИ́РОВАТЬ** *несов.*; *ав.* һауанан патруль яһау (*һауаны дошман авиацияһынан самолёттар ярҙамында һаҡлау*)

**БАРРИКА́ДА** *ж* баррикада; **сража́ться на баррика́дах** баррикадаларҙа һуғышыу

**БАРРИКАДИ́РОВАТЬ** *несов. что* баррикадалау, баррикада ҡороу; **баррикади́ровать у́лицу** урамға баррикада ҡороу

**БАРРИКА́ДНЫЙ,** -ая, -ое баррикада …ы; **баррика́дные бои́** баррикада һуғыштары

**БАРС** *м* барыҫ, ҡаплан

**БА́РСКИЙ,** -ая, -ое барин …ы, байҙарса; **ба́рская уса́дьба** бай (йорто) усадьбаһы; **ба́рские зама́шки** байҙарса ҡыланыш

**БА́РСОВЫЙ,** -ая, -ое ҡаплан …ы; **ба́рсовая шку́ра** ҡаплан тиреһе

**БА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое бариндарға хас, бариндарса, бариндарса эре (һауалы, тәкәббер); **ба́рственный тон** бариндарға хас тон ♦ **ба́рственное отноше́ние к де́лу** эшкә илке-һалҡы мөнәсәбәт, эшкә ғәмһеҙ булыу

**БА́РСТВО** *с* **1.** *собир.* баярҙар, алпауыттар **2.** (*высокомерие*) һауалыҡ, эрелек, тәкәбберлек **3.** (*изнеженность*) наҙлылыҡ, иркәлек, наҙланып (ҡотороп) китеү

**БА́РСТВОВАТЬ** *несов.* эшһеҙ (ғәмһеҙ) йәшәү, бариндар һымаҡ йәшәү

**БАРСУ́К** *м* бурһыҡ; **барсучи́ха** *ж*; *разг.* инә бурһыҡ

**БАРСУ́ЧИЙ,** -ья, -ье бурһыҡ …ы; **барсу́чий жир** бурһыҡ майы; **барсу́чья нора́** бурһыҡ өңө

**БАРХА́НЫ** *мн.* (*ед.* **барха́н** *м*) бархан, ҡом тауы (*сүлдәрҙә*)

**БА́РХАТ** *м* бәрхәт, хәтфә; **зелёный ба́рхат** йәшел бәрхәт

**БАРХАТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәрхәт һымаҡ йомшаҡ; **бархати́стая ко́жа** бәрхәт һымаҡ йомшаҡ тире **2.** *перен.* (*о голосе, звуке*) йомшаҡ, яғымлы; **бархати́стый го́лос** яғымлы тауыш

**БА́РХАТКА** и *разг.* **БАРХО́ТКА** *ж* бәрхәт таҫма

**БА́РХАТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәрхәт; **ба́рхатное пла́тье** бәрхәт күлдәк **2.** *перен. см.* **бархати́стый**

♦ **ба́рхатный сезо́н** бәрхәт сезоны (*көньякта көҙгө айҙар*)

**БА́РХАТЦЫ** *мн.* (*ед.* **ба́рхатец** *м*) бәрхәт үлән

**БАРЧО́НОК** и **БАРЧУ́К** *м*; *уст.* баяр (помещик) балаһы, барин улы

**БА́РЩИНА** *ж* барщина (*крепостнойлыҡ дәүерендә крәҫтиәндәрҙең помещикка мәжбүри эшләүе*)

**БА́РЩИННЫЙ,** -ая, -ое барщина ...ы; **ба́рщинный труд** барщина хеҙмәте

**БА́РЫНЯ** *ж* **1.** барин ҡатыны, байбисә, бикә **2.** (*песня и пляска*) барыня; **плясать ба́рыню** барыня бейеү

**БАРЫ́Ш** *м*; *разг.* табыш, файҙа

**БАРЫ́ШНИК** *м* **1.** *уст.* (*перекупщик*) алыпһатар **2.** (*торговец лошадьми*) ат сауҙагәре

**БАРЫ́ШНИЧАТЬ** *несов.*; *уст.* алып-һатыу менән көн күреү, шөғөлләнеү

**БАРЫ́ШНИЧЕСТВО** *с*; *уст.* алып-һатыу кәсебе

**БА́РЫШНЯ** *ж*; *уст.* **1.** барин ҡыҙы **2.** (*при обращении*) туташ

**БАРЬЕ́Р** *м* **1.** барьер (*сабышта, йүгереүҙә ырғып сығыу өсөн ҡуйылған кәртә*); **ло́шадь легко́ взяла́ барье́р** ат барьер аша еңел һикереп сыҡты **2.** (*перегородка*) тәпәш ҡойма, барьер **3.** *перен.* тотҡарлыҡ, ҡаршылыҡ; **тамо́женные барье́ры** таможня тотҡарлыҡтары

**БАРЬЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое барьер; **барье́рный бег** барьер аша йүгереү

**БАС** *м* бас (**1.** *иң ҡалын ирҙәр тауышы* **2.** *шундай тауыш менән йырлаусы* **3.** *түбән регистрҙағы ҡыллы йәки тынлы музыка ҡоралы*)

**БА́СЕННЫЙ,** -ая, -ое мәҫәл ...ы; **ба́сенный стиль** мәҫәл стиле

**БАСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡалын тауышлы

**БАСИ́ТЬ** *несов.* ҡалын тауыш менән һөйләү (йырлау)

**БАСКА́К** *м*; *ист.* баҫҡаҡ (*бойондороҡло ил халҡынан яһаҡ йыйыусылар башлығы*)

**БАСКЕТБО́Л** *м* баскетбол; **игра́ть в баскетбо́л** баскетбол уйнау

**БАСКЕТБОЛИ́СТ** *м* и **БАСКЕТБОЛИ́СТКА** *ж* баскетболсы

**БАСКЕТБО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое баскетбол ...ы; **баскетбо́льная кома́нда** баскетбол командаһы

**БА́СМА** *ж* басма (*сәс буяуы*)

**БАТАЛИ́СТ** *м* баталист (*һуғыш күренештәрен төшөрөүсе рәссам*)

**БАТА́ЛИЯ** *ж* **1.** *уст.* һуғыш, бәрелеш, баталия **2.** *разг.*, *ирон.* ыҙғыш, талаш, ҡыҫҡырыш

**БАТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое баталия ...ы, һуғыш күренештәрен һүрәтләү ...ы; **бата́льный эпизо́д** баталия эпизоды; **бата́льная жи́вопись** һуғыш күренештәрен һүрәтләүсе һынлы сәнғәт

**БАТАЛЬО́Н** *м* батальон; **та́нковый батальо́н** танк батальоны

**БАТАЛЬО́ННЫЙ,** -ая, -ое батальон ...ы; **батальо́нный команди́р** батальон командиры

**БАТАРЕ́ЙКА** *ж* батарейка (*көсөргәнеште арттырыу йәки энергия биреү өсөн тәғәйенләнгән бәләкәй аккумулятор*); **батаре́йка для карма́нного фонаря́** кеҫә фонары батарейкаһы

**БАТАРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое батарея ...ы; **батаре́йное ору́дие** батарея орудиеһы

**БАТАРЕ́Я** *ж*; *в разн. знач.* батарея; **миномётная батаре́я** миномёт батареяһы; **зени́тная батаре́я** зенит батареяһы; **батаре́я парово́го отопле́ния** пар менән йылытыу батареяһы

**БАТА́Т** *м* батат, татлы картуф (*йылы яҡ үҫемлеге*)

**БА́ТЕНЬКА** *м*; *разг.* (*при обращении*) туғанҡай, ағаҡай

**БАТИПЛА́Н** *м* батиплан (*диңгеҙ тәрәнлектәрен өйрәнеү өсөн тәғәйенләнгән махсус камера*)

**БАТИСКА́Ф** *м* батискаф (*һыу аҫтында тикшеренеүҙәр алып барыу өсөн махсус йыһазландырылған үҙйөрөшлө камера*)

**БАТИ́СТ** *м* батист (*туҡыма*); **бе́лый бати́ст** аҡ батист

**БАТИ́СТОВЫЙ,** -ая, -ое батист ...ы, батистан тегелгән; **бати́стовый плато́к** батист яулыҡ

**БАТИСФЕ́РА** *ж* батисфера (*тәрән һыу аҫтын тикшереү өсөн махсус йыһазландырылған шар формаһындағы ҡорос камера*)

**БАТО́Г** *м*; *уст.* **1.** таяҡ, таяныу таяғы **2.** *мн.* **батоги́** яза биреү (һуҡтырыу) таяғы

**БАТО́Н** *м* батон (**1.** *оҙонса ҡалас* **2.** *оҙонса пәрәник, шоколад*)

**БАТРА́К** *м* и **БАТРА́ЧКА** *ж* батрак, ялсы

**БАТРА́ЦКИЙ** и **БАТРА́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое батрак(тар) ...ы, ялсы(лар) ...ы; **батра́цкий труд** батрактар хеҙмәте

**БАТРА́ЧЕСТВО** *с* **1.** батраклыҡ, ялсылыҡ **2.** *собир.* батрактар, ялсылар

**БАТРА́ЧИТЬ** *несов.* батраклыҡ итеү, батраклыҡта йөрөү, ялсы (батрак) булып эшләү

**БАТТЕРФЛЯ́Й** *м*; *спорт.* баттерфляй (*йөҙөүҙең бер төрө*)

**БАТУ́Т** и **БАТУ́Д** *м* батут, батуд (*циркта, спортта горизонталь хәлдә нығытып ҡуйылған капрон йәки металл сетка*)

**БА́ТЬКА** *м*; *прост. см.* **ба́тюшка** 1

**БА́ТЮШКА** *м* **1.** *уст.* (*отец*) атай **2.** *разг.* (*обращение к собеседнику*) туғанҡай **3.** (*священник*) батюшка, поп ♦ **ба́тюшки (мои́)!** *в знач. межд.* атаҡ, атаҡай!

**БАУ́Л** *м* баул, юл һандығы (төйөнсөгө)

**БАХ** *межд.* шап, доңҡ, гөрҫ

**БА́ХАТЬ** *несов. см.* **ба́хнуть**

**БА́ХАТЬСЯ** *несов. см.* **ба́хнуться**

**БАХВА́Л** *м*; *прост.* маҡтансыҡ, ҡупыр

**БАХВА́ЛИТЬСЯ** *несов.*; *прост.* маҡтаныу, ҡупырайыу, шапырыныу

**БАХВА́ЛЬСТВО** *с*; *разг.* маҡтансыҡлыҡ, ҡупырлыҡ, шапырыныу

**БАХИ́ЛЫ** *мн.* (*ед.* **бахи́ла** *ж*) һунар итеге

**БА́ХНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** шарт (доңҡ) итеү, гөрһөлдәп ҡуйыу; **ору́дие ба́хнуло** орудие гөрһөлдәп ҡуйҙы **2.** *кого-что* (*стукнуть*) тондороу, ҡундырыу, атып бәреү, шап итеп һуғыу; **ба́хнуть по голове́** башына ҡундырыу **3.** әйтеп ҡуйыу (ташлау)

**БА́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*удариться*) шап (лап) итеп барып төшөү, гөрһөлдәп йығылыу

**БАХРОМА́** *ж* суҡ, сәсәк (сасаҡ), суҡлы таҫма; **занаве́ска с бахромо́й** сәсәкле шаршау

**БАХРО́МЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*с бахромой*) суҡлы, сәсәкле; **бахро́мчатый шарф** сәсәкле шарф **2.** (*похожий на бахрому*) сәсәккә оҡшаған; **бахро́мчатый и́ней** сәсәккә оҡшаған бәҫ

**БАХТАРМА́** *ж*; *спец.* күк ит, итләү (*тиренең эске яғы*)

**БАХЧА́** *ж* баҡса (*ҡарбуз, ҡауын, ҡабаҡ баҡсаһы*)

**БАХЧЕВО́Д** *м* баҡсасы, баҡсасылыҡ белгесе

**БАХЧЕВО́ДСТВО** *с* баҡсасылыҡ

**БАХЧЕВО́Й,** -ая, -ое баҡса ...ы ♦ **бахчевы́е культу́ры** баҡса культуралары (*ҡарбуз, ҡауын, ҡабаҡ һ.б.*)

**БАЦ** *межд.* шалт, салт, шап; **бац его́ по спине́** арҡаһына шап иттереү (*һуғыу*)

**БАЦИ́ЛЛА** *ж* бацилла (*таяҡса рәүешендәге бактерия*); **туберкулёзная баци́лла** туберкулёз бациллаһы

**БА́ЦНУТЬСЯ** *сов.*; *прост.* доңҡ (шап, гөрҫ) итеп барып (ҡолап, килеп) төшөү (ҡолау, бәрелеү); **ба́цнуться о зе́млю** ергә гөрҫ итеп килеп төшөү

**БАЧО́К** *м*; *уменьш. от* **бак** I

**БАШ: баш на баш** *прост.* башма-баш, башына-баш

**БА́ШЕНКА** *ж*; *уменьш. от* **ба́шня**

**БА́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое башня ...ы; **ба́шенные часы́** башня сәғәте; **ба́шенное ору́дие** башня орудиеһы

**БАШИБУЗУ́К** *м* башыбоҙоҡ (**1.** *XVIII–XIX бб. Төркиәлә регуляр булмаған ғәскәр һалдаты* **2.** *иҫк. башкиҫәр, юлбаҫар*)

**БАШКА́** *ж*; *прост.* баш

**БАШКИ́РСКИЙ,** -ая, -ое башҡорт(тар) ...ы; **башки́рский наро́д** башҡорт халҡы; **башки́рский язы́к** башҡорт теле; **башки́рский мёд** башҡорт балы; **башки́рская ло́шадь** башҡорт аты

**БАШКИ́РЫ** *мн.* башҡорттар, башҡорт халҡы // *ед.* **башки́р** *м* башҡорт ир-аты; **башки́рка** *ж* башҡорт ҡатын-ҡыҙы

**БАШКОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* башлы, аҡыллы, зирәк, отҡор; **башкови́тый учени́к** башлы уҡыусы

**БАШЛЫ́К** *м* башлыҡ (*буҫтауҙан йәки туланан тегелгән баш кейеме*)

**БАШМАКИ́** *мн.* (*ед.* **башма́к** *м*) башмаҡ (**1.** *аяҡ кейеме* **2.** *тех. ҡоралды һаҡлау өсөн уға кейҙереп ҡуйыла торған ҡулайлама* **3.** *т. юл. вагондарҙы туҡтатыу өсөн рельс өҫтөнә һалына торған ҡулайлама*) ♦ **быть (находи́ться) под башмако́м** *у кого кемдеңдер* йоғонтоһо аҫтында булыу

**БАШМА́ЧНИК** *м* **1.** *уст.* башмаҡсы, башмаҡ тегеүсе, итексе **2.** башмаҡсы (*тимер юл эшсеһе*)

**БАШМА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое башмаҡ ...ы; **башма́чная коло́дка** башмаҡ ҡалыбы

**БА́ШНЯ** *ж*; *в разн. знач.* башня; **кремлёвские ба́шни** кремль башнялары; **телевизио́нная ба́шня** телевизион башня; **си́лосная ба́шня** силос башняһы; **ба́шня та́нка** танк башняһы

**БА́Ю-БА́ЮШКИ-БАЮ́** *межд.* әлли-бәлли, бәү-бәү, бәлли-бәү

**БАЮ́КАНЬЕ** *с см.* **баю́кать**

**БАЮ́КАТЬ** *несов. кого* бәү-бәү иттереү, көйләп бәүетеү

**БАЯ́Н** *м*; *муз.* баян; **игра́ть на бая́не** баянда уйнау

**БАЯНИ́СТ** *м* баянсы, баянда уйнаусы; **выступле́ния баяни́стов** баянсылар сығышы

**БДЕ́НИЕ** *с см.* **бдеть**

**БДЕТЬ** *несов.*; *книжн.*, *уст.* **1.** (*не спать*) йоҡламау, уяу булыу **2.** (*неустанно следить за кем-чем-л.*) бер туҡтауһыҙ күҙәтеү, күҙәтеп тороу

**БДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* уяулыҡ, һиҙгерлек, һаҡлыҡ; **прояви́ть бди́тельность** һиҙгерлек күрһәтеү

**БДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уяу, һиҙгер, һаҡ; **бди́тельный челове́к** уяу кеше

**БЕГ** *м* **1.** *см.* **бе́гать** 1, 2; **на бегу́** йүгереп барышлай; **бег на сто ме́тров** йөҙ метрға йүгереү **2.** *мн.* **бега́** (*гонки, скачки*) бәйге, сабыш, юртаҡтар сабышы, ат сабышы; **пойти́ на бега́** бәйгегә барыу; **соба́чьи бега́** эт сабышы ♦ **в бега́х** эш артынан сабыу

**БЕ́ГАТЬ** *несов.* **1.** (*бежать в различных направлениях*) йүгереү, йүгерешеп йөрөү; **де́ти бе́гают на у́лице** балалар урамда йүгерешеп йөрөй **2.** (*заниматься бегом как спортом*) йүгереү; **бе́гать на дли́нные диста́нции** алыҫ араға йүгереү **3.** (*избегать кого-чего-л.*) ҡасыу, ҡасып йөрөү; **от де́ла не бе́гай** эштән ҡасма **4.** (*о быстром движении*) уйнаҡлап (йүгереп) тороу; **его́ па́льцы бе́гают по кла́вишам** бармаҡтары клавишала йүгереп тора **5.** (*ухаживать*) *за кем*; *прост.* йөрөү, артынан йөрөү; **бе́гать за де́вушками** ҡыҙҙар артынан йөрөү ♦ **мура́шки по спине́ (по те́лу, по ко́же) бе́гают** тән сымырлай, төктәр өрпәйә (*ҡурҡыуҙан, тулҡынланыуҙан*)

**БЕГЕМО́Т** *м* (*самец*) һыу үгеҙе; (*самка*) һыу һыйыры

**БЕГЛЕ́Ц** *м* и **БЕГЛЯ́НКА** *ж* ҡаҫҡын, ҡасаҡ

**БЕ́ГЛОСТЬ** *ж* тиҙлек, йәһәтлек, йүгереклек, йылдамлыҡ (*уҡыуҙа, музыка ҡоралында уйнағанда*); **бе́глость чте́ния** йүгерек уҡыу

**БЕ́ГЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в знач. сущ.* **бе́глый** *м* и **бе́глая** *ж* (*совершивший побег откуда-л.*) ҡасҡын, ҡасаҡ, ҡасып киткән; **поймка бе́глых** ҡасҡындарҙы тотоу **2.** (*мимолётный, быстрый*) йүгерек; **бе́глый взгляд** йүгерек ҡараш **3.** (*не затруднённый, свободный*) тиҙ, етеҙ, йүгерек, иркен (*уҡыуҙа, музыка ҡоралында*); **бе́глая игра́ на пиани́но** пианинола иркен уйнау **4.** өҫтән-мөҫтән генә, иғтибарһыҙ эшләнгән; **бе́глый обзо́р газе́ты** гәзиткә өҫтән-мөҫтән генә яһалған күҙәтеү ♦ **бе́глые гла́сные** *лингв.* төшөп ҡалыусан һуҙынҡылар; **бе́глый ого́нь** тиҙ-тиҙ (тоҫҡамай) атыу

**БЕГОВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*служащий для быстрой езды, бега, бегов; пригодный для них*) сапҡыр, бәйге, сабыш, йүгерешеү, уҙышыу, сабышыу ...ы; **беговы́е ло́шади** бәйге (сабыш) аттары; **бегова́я доро́жка** йүгерешеү (уҙышыу, сабышыу) юлы **2.** (*относящийся к бегам*) йүгереү, сабышыу ...ы; **бегова́я програ́мма** йүгереү программаһы

**БЕГО́М** *нареч.* йүгереп, йүгертеп, тиҙ генә; **бежа́ть бего́м** йүгереп барыу

**БЕГО́НИЯ** *ж* бегония, әҙрәс гөл (*декоратив үҫемлек*)

**БЕГОТНЯ́** *ж* **1.** тегендә-бында йүгерешеү (сабышыу), йүгереш, сабыш; **де́ти по́дняли беготню́** балалар тегендә-бында йүгерешә башланы **2.** *перен.* (*хлопоты, требующие спешки*) ығы-зығы; **весь день прошёл в беготне́** көн ығы-зығы менән үтте

**БЕ́ГСТВО** *с* **1.** (*быстрое беспорядочное отступление*) ҡасыу, сигенеү; **пани́ческое бе́гство** паникаға бирелеп ҡасыу **2.** (*самовольный, тайный уход, побег*) ҡасыу, ҡасып китеү; **бе́гство из пле́на** әсирлектән ҡасыу; **спасти́сь бе́гством** ҡасып ҡотолоу

**БЕГУ́Н** *м* **1.** йүгереүсе, йүгерек; **бегу́н на коро́ткие диста́нции** яҡын араға йүгереүсе; **соревнова́ние бегуно́в** йүгеректәр ярышы **2.** *уст.* (*быстрая на ходу лошадь*) шәп сабыусан, йүгерек, сапҡыр **3.** *мн.* **бегуны́** бегун (*нәмәләрҙе онтау йәки бутау өсөн ике таш тәгәрмәстән эшләнгән ҡулайлама*); **ме́льничные бегуны́** тирмән бегуны

**БЕГУ́ЧИЙ,** -ая, -ее ағын, йор, йүгерек, йылдам, етеҙ (*ағым һыу хаҡында*); **бегу́чий руче́й** йүгерек шишмә

**БЕДА́** *ж* **1.** бәлә, ҡаза, бәлә-ҡаза; **попа́сть в беду́** бәләгә ҡалыу (тарыу); **вы́ручить из беды́** бәләнән ҡотҡарыу (*сығарыу*) **2.** *в знач. сказ.* бик ҡыйын (ауыр); **беда́ мне с ним** уның менән миңә бик ҡыйын **3.** *в знач. сказ.*; *прост.* бик күп, ифрат күп, иҫ киткес күп; **люде́й там — беда́** кешеләр унда иҫ киткес күп ♦ **беда́ как** бик; **не велика́ беда́** артыҡ зыян юҡ, бошонорлоҡ түгел; **на беду́** бәхетһеҙлеккә ҡаршы, бәләгә ҡаршы; **про́сто беда́** аптыраш

**БЕДЛА́М** *м обычно в знач. сказ.*; *разг.* тәртипһеҙлек, ығы-зығы, шау-шыу

**БЕДНЕ́ТЬ** *несов.* ярлыланыу, фәҡирләнеү

**БЕ́ДНОСТЬ** *ж* **1.** (*нужда*) ярлылыҡ, фәҡирлек, хәйерселек, юҡсыллыҡ, мохтажлыҡ; **жить в бе́дности** хәйерселектә йәшәү **2.** (*недостаточность чего-л., скудость в чём-л.*) һайлыҡ, ярлылыҡ; **бе́дность мы́сли** фекер һайлығы

**БЕДНОТА́** *ж* **1.** *собир.* (*неимущие люди*) ярлы-ябағай, ярлылар, фәҡир-фоҡара **2.** *разг. см.* **бе́дность** 1

**БЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ярлы, фәҡир; **бе́дный челове́к** фәҡир кеше **2.** (*имеющий недостаток в чём-л., скудный*) ярлы; **бе́дная приро́да** ярлы тәбиғәт; **бе́дная фанта́зия** ярлы хыял, фантазияға ярлы **3.** (*несчастный*) ҡыҙғаныс, бахыр, меҫкен; **бе́дный, он так бо́лен** меҫкен, ул шул тиклем ныҡ ауырый

**БЕДНЯ́ГА** *м* и *ж*; *разг.* бахыр, меҫкен, бисара, байғош

**БЕДНЯ́ЖКА** *м* и *ж*; *разг.* бахырҡай, меҫкенкәй, бисара

**БЕДНЯ́К** *м* **1.** ярлы (фәҡир) кеше **2.** ярлы крәҫтиән, ауыл ярлыһы

**БЕДНЯ́ЦКИЙ,** -ая, -ое ярлы, фәҡир; **бедня́цкие ма́ссы** ярлылар массаһы

**БЕДОВА́ТЬ** *несов.*; *прост.* ярлылыҡта (хәйерселектә, фәҡирлектә) йәшәү

**БЕДО́ВЫЙ,** -ая, -ое шуҡ, ҡыйыу, үткер; **бедо́вый ма́льчик** шуҡ малай

**БЕДОКУ́Р** *м*; *разг.* шуҡ, тиктормаҫ кеше

**БЕДОКУ́РИТЬ** *несов.*; *разг.* бәлә тыуҙырыу (килтереү), зыян эшләү

**БЕДОЛА́ГА** *м* и *ж*; *прост. см.* **бедня́га**

**БЕ́ДРЕННЫЙ,** -ая, -ое бот ...ы; **бе́дренная кость** бот һөйәге

**БЕДРО́** *с* **1.** (*часть ноги*) бот **2.** (*наружная сторона верхней части ноги*) янбаш; **с широ́кими бёдрами** киң янбашлы

**БЕ́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ауыр, ҡыйын, бәләле, бәлә-ҡазалы; **бе́дственное положе́ние** ауыр хәл

**БЕ́ДСТВИЕ** *с* бәлә-ҡаза, афәт, һәләкәт, ҙур бәхетһеҙлек; **стихи́йное бе́дствие** афәт, стихиялы бәлә-ҡаза; **терпе́ть бе́дствие** бәлә-ҡаза күреү

**БЕ́ДСТВОВАТЬ** *несов.* мохтажлыҡта (фәҡирлектә, хәйерселектә) йәшәү, ауыр көн күреү (итеү)

**БЕДУИ́Н** *м* бәҙүән (*күсмә ғәрәп*)

**БЕЖ** *прил. неизм.* аҡһыл көрән; **ту́фли цве́та беж** аҡһыл көрән төҫтәге туфли

**БЕЖА́ТЬ** *несов.* **1.** йүгереү; **бежа́ть изо всех сил** бөтә көскә йүгереү; **бежа́ть наперегонки́** кем уҙарҙан йүгереү; **бежа́ть с эстафе́той** эстафетала йүгереү; **бежа́ть на пятьсо́т ме́тров** биш йөҙ метрға йүгереү **2.** *перен.* (*быстро передвигаться — о средствах передвижения*) елеү, елдереү, сабыу; **по́езд бежи́т** поезд елдерә; **по шоссе́ бе-**

**гу́т маши́ны** шоссе буйлап машиналар елә **3.** (*быстро перемещаться, нестись* (*о дымке, облаках и т.д.*) ағылыу; **облака́ бегу́т на се́вер** болоттар төньяҡҡа ағыла **4.** *сов., несов.* (*спастись бегством*) ҡасыу, ҡасып ҡотолоу; **бежа́ть из окруже́ния** ҡамауҙан ҡасыу; **бежа́ть из пле́на** плендан ҡасыу **5.** (*быстро проходить, протекать — о времени*) үтеү, уҙыу; **дни бегу́т** көндәр үтә; **вре́мя бежи́т** ваҡыт уҙа; **го́ды бегу́т** йылдар уҙа **6.** (*течь, литься*) ағыу, һарҡыу; **река́ бежи́т** йылға аға; **вода́ бежи́т из кра́на** крандан (һеҙмәктән) һыу аға; **слёзы бегу́т** күҙ йәштәре аға; **кровь из ра́ны бежи́т** яранан (йәрәхәттән) ҡан һарҡа (аға) **7.** *разг.* (*при кипячении*) ташыу; **самова́р бежи́т** самауыр таша; **молоко́ бежи́т** һөт таша **8.** *разг.* (*идти вперёд, спешить — о часах*) алға китеү; **мои́ часы́ бегу́т** сәғәтем алға китә

**БЕ́ЖЕВЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **беж**; **бе́жевое пла́тье** аҡһыл көрән күлдәк; **бе́жевые сапоги́** аҡһыл көрән итек

**БЕ́ЖЕНЕЦ** *м* и **БЕ́ЖЕНКА** *ж* ҡасаҡ

**БЕ́ЖЕНСКИЙ,** -ая, -ое ҡасаҡ(тар) ...ы; **бе́женский обо́з** ҡасаҡтар ылауы

**БЕЗ** и **БЕЗО** *предлог с род. п.* **1.** (*при указании на недостаток, отсутствие кого-чего-л.*) -һыҙ/-һеҙ; **расти́ без отца́** атайһыҙ үҫеү; **чай без молока́** һөтһөҙ сәй; **сиде́ть без огня́** утһыҙ ултырыу; **жить без друзе́й** дуҫ-ишһеҙ йәшәү; **рабо́тать без о́тдыха** ялһыҙ эшләү; **бе́з вести пропа́л** хәбәрһеҙ юғалды

**2.** (*в отсутствие кого-л.*) -дан/-дән башҡа, юғында, юҡ саҡта; **без нас не ходи́** беҙҙән башҡа барма (йөрөмә); **это сде́лано без ва́шей по́мощи** был һеҙҙең ярҙамдан башҡа эшләнде

**3.** (*при словах, обозначающих количество или меру, указывает на недостающее до полной меры количество*) -дан/-дән; **ребёнку год без трёх дней** балаға өс көндән бер йәш була; **без пяти́ мину́т де́вять** биш минуттан туғыҙ ♦ **без исключе́ния** береһе лә ҡалмай, тулыһынса, бөтөнләй; **без ма́лого** әҙ тигәндә; **без сомне́ния** һис шикһеҙ; **без огля́дки** артына ҡарамайынса, алдын-артын ҡарамай; **без у́стали** арымай-талмай; **без у́молку** туҡтауһыҙ, туҡтамайынса, өҙлөкһөҙ; **не без по́льзы** файҙаһыҙ түгел; **не без того́ (что́бы)** унһыҙ булмаҫ

**БЕЗ...** (**безъ..., бес...**) *приставка* **1.** (*исемдән яһалған сифаттарҙа берәй нәмәнең булмауын аңлата*) -һыҙ/-һеҙ; **безно́гий** аяҡһыҙ; **безрабо́тный** эшһеҙ; **бесшу́мный** тауышһыҙ; **безлоша́дный** атһыҙ; **бездо́мный** өйһөҙ, йортһоҙ; **безъязы́кий** телһеҙ; **безысхо́дный** ҡотолғоһоҙ **2.** (*"-ие", "-ье", "-ица", "-ость" ялғауҙары менән яһалған исемдәрҙә берәй нәмәнең булмауын йәки кәм булыуын белдерә*) -һыҙлыҡ/-һеҙлек; **безу́мие** башһыҙлыҡ, аҡылһыҙлыҡ; **безво́дье** һыуһыҙлыҡ; **безве́трие** елһеҙлек; **бездоро́жье** юлһыҙлыҡ; **бессерде́чие** шәфҡәтһеҙлек; **безвку́сица** зауыҡһыҙлыҡ; **безыде́йность** идеяһыҙлыҡ; **безызве́стность** билдәһеҙлек

**БЕЗАВАРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое аварияһыҙ, бәләҡазаһыҙ; **безавари́йное движе́ние** аварияһыҙ хәрәкәт; **безавари́йная рабо́та** аварияһыҙ эш

**БЕЗАЛА́БЕРНОСТЬ** *ж* тәртипһеҙлек, рәтһеҙлек, йыйнаҡһыҙлыҡ

**БЕЗАЛА́БЕРНЫЙ,** -ая, -ое тәртипһеҙ, рәтһеҙ, йүнһеҙ, арамъя, шалҡы; **безала́берный челове́к** шалҡы кеше; **безала́берная рабо́та** тәртипһеҙ эш

**БЕЗАЛА́БЕРЩИНА** *ж*; *разг.* тәртипһеҙлек, бола, буталсыҡлыҡ; **безала́берщина в до́ме** өйҙәге тәртипһеҙлек

**БЕЗАЛКОГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое алкоголһеҙ, иҫертмәй торған; **безалкого́льные напи́тки** алкоголһеҙ эсемлектәр

**БЕЗАПЕЛЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *юр.* апелляцияһыҙ, апелляцияға бирелмәй торған; **безапелляцио́нный пригово́р** апелляцияға бирелмәй торған хөкөм **2.** ҡаты, ҡырҡа, ҡәтғи; **безапелляцио́нное реше́ние** ҡәтғи ҡарар

**БЕЗБЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое мул, етеш, мохтажлыҡһыҙ; **безбе́дная жизнь** мул тормош

**БЕЗБИЛЕ́ТНИК** *м* и **БЕЗБИЛЕ́ТНИЦА** *ж* *разг.* билетһыҙ пассажир (тамашасы)

**БЕЗБИЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое билетһыҙ, билеты булмаған; **безбиле́тный пассажи́р** билетһыҙ пассажир

**БЕЗБО́ЖИЕ** *с* аллаһыҙлыҡ, динһеҙлек, дәһрилек, аллаға ышанмау

**БЕЗБО́ЖНИК** *м* и **БЕЗБО́ЖНИЦА** *ж* **1.** аллаһыҙ, динһеҙ, дәһри (*кеше*) **2.** *уст., бран.* оятһыҙ, выжданһыҙ, намыҫһыҙ (*әҙәм*)

**БЕЗБО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* алланы (диндә) танымаған, аллаға (дингә) ышанмаған **2.** *разг.* оятһыҙ, выжданһыҙ, намыҫһыҙ; **безбо́жная клевета́** оятһыҙ ғәйбәт

**БЕЗБОЛЕ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое ауыртыуһыҙ, ауырттырыуһыҙ; **безболе́зненная опера́ция** ауырттырыуһыҙ үткәрелгән операция

**БЕЗБОРО́ДЫЙ,** -ая, -ое һаҡалһыҙ, күҫә; **безборо́дый мужчи́на** һаҡалһыҙ ир, күҫә ир

**БЕЗБОЯ́ЗНЕННОСТЬ** *ж* ҡыйыулыҡ, ҡурҡыуһыҙлыҡ, ҡурҡмағанлыҡ; **безбоя́зненность мы́слей** фекерҙәр ҡыйыулығы

**БЕЗБОЯ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡыйыу, ҡурҡыуһыҙ, ҡурҡыу белмәгән; **безбоя́зненный челове́к** ҡурҡыу белмәгән кеше

**БЕЗБРА́ЧИЕ** *с* буйҙаҡлыҡ, өйләнмәү, өйләнмәй (яңғыҙ) йәшәү (*ирҙәргә ҡарата*); кейәүгә сыҡмау, кейәүгә сыҡмай йәшәү (*ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата*)

**БЕЗБРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое өйләнмәгән, кейәүгә сыҡмаған, никахһыҙ

**БЕЗБРЕ́ЖНОСТЬ** *ж* икһеҙ-сикһеҙлек, осһоҙ-ҡырыйһыҙлыҡ; **безбре́жность океа́на** океандың икһеҙ-сикһеҙлеге

**БЕЗБРЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, бик ҙур, бик киң; **безбре́жное мо́ре** икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ; **безбре́жная степь** осһоҙ-ҡырыйһыҙ ялан

**БЕЗБРО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡашһыҙ, һирәк ҡашлы; **безбро́вый ребёнок** һирәк ҡашлы бала

**БЕЗВЕ́РИЕ** *с* аллаға ышанмау, аллаға ышанмаусылыҡ

**БЕЗВЕ́РХИЙ,** -ая, -ое түбәһе булмаған, осһоҙ; **безве́рхая берёза** осһоҙ (осо ҡырҡылған) ҡайын

**БЕЗВЕ́СТНОСТЬ** *ж* **1.** (*неизвестность*) билдәһеҙлек, танылмағанлыҡ; **жить в безве́стности** билдәһеҙлектә йәшәү **2.** (*отсутствие вестей, сведений о ком-чём-л.*) хәбәрһеҙлек, хәбәрхәтерһеҙ булыу

**БЕЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** билдәһеҙ, таныш булмаған; **безве́стный солда́т** билдәһеҙ һалдат **2.** танылмаған, таныҡһыҙ, данлыҡһыҙ; **безве́стный челове́к** билдәһеҙ кеше

**БЕЗВЕ́ТРЕННЫЙ,** -ая, -ое елһеҙ, тымыҡ; **безве́тренный день** елһеҙ көн

**БЕЗВЕ́ТРИЕ** *с* елһеҙлек, тынлыҡ, һиллек

**БЕЗВИ́ННОСТЬ** *ж* ғәйепһеҙлек, гөнаһһыҙлыҡ

**БЕЗВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое ғәйепһеҙ, гөнаһһыҙ; **безви́нный челове́к** ғәйепһеҙ кеше

**БЕЗВКУ́СИЕ** *с* зауыҡһыҙлыҡ, тәм (йәм) белмәү, матурлыҡты (күркәмлекте, нәфислекте) тоя белмәү, килешһеҙлек

**БЕЗВКУ́СИЦА** *ж*; *разг. см.* **безвку́сие**

**БЕЗВКУ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о пище*) тәмһеҙ, сөсө; **безвку́сная еда́** тәмһеҙ аш **2.** (*лишённый изящества*) йәмһеҙ, килешһеҙ, шыҡһыҙ, ятышһыҙ; **безвку́сный костю́м** килешһеҙ (тегелгән) костюм **3.** (*о человеке, не обладающем хорошим вкусом*) зауыҡһыҙ, матурлыҡты (күркәмлекте, нәфислекте) тоя белмәгән; **безвку́сный челове́к** зауыҡһыҙ кеше

**БЕЗВЛА́СТИЕ** *с* власһыҙлыҡ, власть (башлыҡ) булмау; **цари́т безвла́стие** власһыҙлыҡ хөкөм һөрә

**БЕЗВЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое власһыҙ, йомшаҡ; **безвла́стный челове́к** йомшаҡ кеше

**БЕЗВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һыуһыҙ, һыуға (дымға) ярлы; **безво́дная пусты́ня** һыуһыҙ сүл **2.** *хим.* һыуһыҙ, һыуы булмаған, һыу ҡушылмаған; **безво́дная кислота́** һыу ҡушылмаған кислота

**БЕЗВО́ДЬЕ** *с* һыуһыҙлыҡ, һыу булмау, һыу аҙлыҡ; **страда́ть от безво́дья** һыуһыҙлыҡтан йонсоу

**БЕЗВОЗВРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*утраченный навсегда*) мәңгегә юғалған, кире ҡайтмай торған; **безвозвра́тное про́шлое** кире ҡайтмай торған ваҡыт **2.** (*не подлежащий возврату*) кире ҡайтарылмай торған, ҡайтарыуһыҙ; **безвозвра́тная ссу́да** кире ҡайтарылмай торған ссуда

**БЕЗВОЗДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое һауаһыҙ; **безвозду́шное простра́нство** һауаһыҙ бушлыҡ

**БЕЗВОЗМЕ́ЗДНЫЙ,** -ая, -ое түләүһеҙ, бушлай; **безвозме́здная услу́га** түләүһеҙ ярҙам

**БЕЗВО́ЛИЕ** *с* ихтыярһыҙлыҡ, ебегәнлек, йомшаҡлыҡ

**БЕЗВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое сәсһеҙ, сәс үҫмәгән; **безволо́сый челове́к** сәсһеҙ кеше

**БЕЗВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ихтыярһыҙ, ебегән, йомшаҡ; **безво́льный челове́к** ихтыярһыҙ кеше; **безво́льный хара́ктер** йомшаҡ холоҡ

**БЕЗВРЕ́ДНОСТЬ** *ж* зарарһыҙлыҡ, зыянһыҙлыҡ, зарарһыҙ (зыянһыҙ) булыу; **безвре́дность произво́дства** производствоның зарарһыҙлығы

**БЕЗВРЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое зарарһыҙ, зыянһыҙ; **безвре́дное сре́дство** зыянһыҙ сара

**БЕЗВРЕ́МЕННОСТЬ** *ж* ваҡытһыҙлыҡ, ваҡытынан элек (алда) булыу

**БЕЗВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое ваҡытһыҙ, ваҡытынан элек (алда); **безвре́менная конч́ина** ваҡытһыҙ үлем

**БЕЗВРЕ́МЕНЬЕ** *с* (*тяжёлое время*) ауыр ваҡыт, ауыр заман; торғонлоҡ

**БЕЗВЫ́ЕЗДНЫЙ,** -ая, -ое (*о пребывании где-л.*) бер ергә лә (бер ҡайҙа ла) китмәйенсә (сыҡмайынса); **безвы́ездное житьё** бер ергә лә китмәйенсә йәшәү

**БЕЗВЫ́ЛАЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*о пребывании где-л.*) бер ергә лә (бер ҡайҙа ла) китмәйенсә (сыҡмайынса)

**БЕЗВЫ́ХОДНОСТЬ** *ж* ҡотолғоһоҙлоҡ, сараһыҙлыҡ, ҡотолғоһоҙ булыу

**БЕЗВЫ́ХОДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*без отлучек куда-л.*) бер ҡайҙа ла (бер ергә лә) сыҡмайынса (бармайынса); **безвы́ходное сиде́нье до́ма** бер ҡайҙа ла сыҡмайынса өйҙә ултырыу **2.** (*безысходный — о положении, состоянии*) ҡотолғоһоҙ, сараһыҙ; **безвы́ходное положе́ние** ҡотолғоһоҙ хәл

**БЕЗГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое күҙһеҙ, күҙ(ҙәр)е һуҡырайған

**БЕЗГЛА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*лишённый речи*) телһеҙ **2.** (*не выражающий своего мнения*) ҡыйыуһыҙ, йыуаш, һүҙһеҙ, тауыш-тынһыҙ; **безгла́сный челове́к** тауыш-тынһыҙ (йыуаш) кеше

**БЕЗГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лишённый головы*) башһыҙ, башы киҫелгән; **безголо́вая ту́ша** башһыҙ түшкә **2.** *перен., разг.* (*глупый*) аңра, аңыш, миңрәү, башһыҙ; **безголо́вый челове́к** аңра кеше **3.** *перен., разг.* (*забывчивый*) тиҙ онотоусан, һыу мейе, башһыҙ, хәтерһеҙ

**БЕЗГОЛО́СИЦА** *ж*; *разг.* тауыш бөтөү, тауыштан яҙыу (ҡалыу)

**БЕЗГОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** тауышы булмаған, тауышһыҙ; **безголо́сый челове́к**



3 зак. 2.0084.05

тауышһыҙ кеше **2.** (*с плохим, слабым голосом*) тауышһыҙ, насар тауышлы; **безголо́сый пев́ец** насар тауышлы йырсы

**БЕЗГРА́МОТНОСТЬ** *ж* **1.** (*неграмотность*) уҡый-яҙа белмәү, наҙанлыҡ, грамотаһыҙлыҡ; **борьба́ с безгра́мотностью** грамотаһыҙлыҡ менән көрәш **2.** *перен.* (*невежественность в какой-л. области*) наҙанлыҡ, наҙан булыу; белемһеҙлек; **техни́ческая безгра́мотность** техника буйынса (яғынан) наҙан булыу

**БЕЗГРА́МОТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неграмотный*) уҡый-яҙа белмәгән, белемһеҙ, грамотаһыҙ, наҙан, ноҡот; **безгра́мотный челове́к** грамотаһыҙ кеше **2.** (*содержащий много ошибок*) хаталы; **безгра́мотный дикта́нт** хаталы диктант **3.** *перен.* (*невежественный в какой-л. области*) мәғлүмәтһеҙ, наҙан; **техни́чески безгра́мотный челове́к** техник яҡтан наҙан кеше

**БЕЗГРАНИ́ЧНОСТЬ** *ж* икһеҙ-сикһеҙлек, осһоҙ-ҡырыйһыҙлыҡ, иге-сиге булмау, сикһеҙлек; **безграни́чность пусты́ни** сүлдең икһеҙ-сикһеҙлеге

**БЕЗГРАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*бесконечный*) икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, сикһеҙ-ҡырыйһыҙ, иге-сиге булмаған, сикһеҙ; **безграни́чная степь** икһеҙ-сикһеҙ дала; **безграни́чные просто́ры** осһоҙ-ҡырыйһыҙ киңлектәр **2.** *перен.* сикһеҙ, сиктән тыш ҙур; **безграни́чная ра́дость** сикһеҙ ҙур шатлыҡ; **безграни́чная скорбь** сиктән тыш ҙур ҡайғы

**БЕЗГРЕ́ШНОСТЬ** *ж* гөнаһһыҙлыҡ, ғәйепһеҙлек

**БЕЗГРЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** гөнаһһыҙ, ғәйепһеҙ, гонаһы булмаған; **безгре́шный челове́к** гөнаһһыҙ кеше **2.** (*невинный, чистый*) таҙа, саф, ғәйепкә алырлыҡ булмаған

**БЕЗДА́РНОСТЬ** *ж* **1.** (*отсутствие таланта, одарённости*) йүне юҡлыҡ, һәләтһеҙ эшләнеш; **безда́рность произведе́ния** әҫәрҙең һәләтһеҙ эшләнеше **2.** (*о бездарном человеке*) талантһыҙлыҡ, һәләтһеҙлек, булдыҡһыҙлыҡ

**БЕЗДА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лишённый таланта, одарённости*) булдыҡһыҙ, һәләтһеҙ, эшлекһеҙ, талантһыҙ; **безда́рный поэт** талантһыҙ шағир; **безда́рный челове́к** талантһыҙ кеше **2.** (*выполненный неталантливо*) насар (һәләтһеҙ) эшләнгән, сейле-бешле; **безда́рный стих** сейле-бешле шиғыр; **безда́рная карти́на** һәләтһеҙ эшләнгән картина

**БЕ́ЗДАРЬ** и *уст.* **БЕЗДА́РЬ** *ж*; *разг.* талантһыҙ, һәләтһеҙ, булдыҡһыҙ

**БЕЗДЕ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не проявляющий деятельности, пассивный*) эшлекһеҙ, һүлпән, вайымһыҙ, ғәмһеҙ, бошмаҫ; **безде́йственный челове́к** вайымһыҙ кеше **2.** (*не заполненный деятельностью, не связанный с каким-л. занятием*) тик торған, тик ултырған, эшһеҙ, хәрәкәтһеҙ, ҡул ҡаушырып; **безде́йственное сиде́ние** ҡул ҡаушырып ултырыу

**БЕЗДЕ́ЙСТВИЕ** *с* тик (буш) тороу, ғәмһеҙлек

**БЕЗДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** (*о человеке*) тик (буш, хәрәкәтһеҙ) тороу, бер нәмә лә эшләмәү **2.** (*о машинах, предприятиях и т.д.*) эшләмәү, туҡтап тороу; **тра́ктор безде́йствует** трактор эшләмәй

**БЕЗДЕ́ЛИЦА** *ж*; *разг.* ваҡ-төйәк, юҡ-бар нәмә

**БЕЗДЕЛУ́ШКА** *ж* ваҡ-төйәк биҙәнеү әйберҙәре (нәмәләре); **же́нские безделу́шки** ҡатын-ҡыҙҙың биҙәнеү әйберҙәре

**БЕЗДЕ́ЛЬЕ** *с* эшһеҙлек, тик йөрөү; **томи́ться от безде́лья** эшһеҙлектән интегеү

**БЕЗДЕ́ЛЬНИК** *м* и **БЕЗДЕ́ЛЬНИЦА** *ж*; *разг.* **1.** ялҡау, эшлекһеҙ кеше **2.** *бран.* (*о пустом и бессовестном человеке*) йүнһеҙ кеше

**БЕЗДЕ́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.* эшһеҙ йөрөү, тик йөрөү, эт һуғарыу

**БЕЗДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* эшһеҙ; **безде́льные дни** эшһеҙ көндәр **2.** *уст.* юҡ-бар, ваҡ-төйәк, бик бәләкәй, әһәмиәтһеҙ; **безде́льный воро́с** юҡ-бар мәсьәлә (һорау)

**БЕЗДЕ́НЕЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *фин.* (*производимый без денег, на основе обмена взаимных расчётов*) аҡсаһыҙ, аҡса түләмәйенсә башҡарыла торған, ҡул аҡсаһыҙ; **безде́нежный расчёт** ҡул аҡсаһыҙ иҫәп **2.** *разг.* (*нуждающийся в деньгах*) аҡсаһыҙ, аҡсаға мохтаж; **безде́нежный челове́к** аҡсаһыҙ кеше

**БЕЗДЕ́НЕЖЬЕ** *с* аҡсаһыҙлыҡ, аҡсаға ҡытлыҡ, аҡсаға мохтажлыҡ, аҡса юҡлыҡ

**БЕЗДЕ́ТНОСТЬ** *ж* балаһыҙлыҡ, балаһы юҡлыҡ, балаһыҙ булыу

**БЕЗДЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое балаһыҙ, балаһы булмаған, балаһы юҡ; **безде́тная семья́** балаһыҙ ғаилә

**БЕЗДЕФИЦИ́ТНОСТЬ** *ж* дефицитһыҙлыҡ, етеш булыу

**БЕЗДЕФИЦИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое дефицитһыҙ, **бездефици́тный бюдже́т** дефицитһыҙ бюджет

**БЕЗДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** *ж* эшлекһеҙлек, эштә һүлпәнлек, эшкә һалҡын ҡараш

**БЕЗДЕ́ЯТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эшлекһеҙ, эшкә һүлпән; **безде́ятельный челове́к** эшлекһеҙ кеше

**БЕ́ЗДНА** *ж* **1.** төпһөҙ, упҡын, тәрән; **морска́я бе́здна** диңгеҙ упҡыны **2.** *разг.* (*множество*) бик күп, сикһеҙ күп, икһеҙ-сикһеҙ, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ; **бе́здна наро́ду** бик күп халыҡ

**БЕЗДО́ЖДЬЕ** *с* ҡоролоҡ, ямғыр юҡлыҡ, ямғырһыҙлыҡ

**БЕЗДОКАЗА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* дәлилһеҙлек, нигеҙһеҙ булыу, иҫбат ителмәү; **бездоказа́тельность обвине́ния** ғәйепләүҙең нигеҙһеҙ булыуы

**БЕЗДОКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дәлилһеҙ, нигеҙһеҙ, иҫбат ителмәгән; **бездоказа́тельная мысль** нигеҙһеҙ фекер

**БЕЗДО́ЛЬЕ** *с*; *прост.* михнәт, бәхетһеҙлек, ҡайғы-хәсрәт

**БЕЗДО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* михнәтле, бәхетһеҙ, ҡайғы-хәсрәтле; **бездо́льная жизнь** бәхетһеҙ тормош

**БЕЗДО́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йорт-ере булмаған, йортһоҙ, төйәкһеҙ, эйәһеҙ; **бездо́мная соба́ка** эйәһеҙ эт **2.** *уст.* ғаиләһе булмаған, ғаиләһеҙ, яңғыҙ; **бездо́мный челове́к** ғаиләһеҙ кеше

**БЕЗДО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не имеющий дна*) төбө булмаған, төпһөҙ; **бездо́нное ведро́** төпһөҙ биҙрә **2.** *перен.* (*чрезвычайно глубокий*) бик тәрән, төпһөҙ; **бездо́нный о́мут** төпһөҙ соңғол (ятыу); **бездо́нная про́пасть** бик тәрән упҡын **3.** *перен.* (*очень глубокий и вместительный*) төпһөҙ; **бездо́нный карма́н** төпһөҙ кеҫә; **бездо́нный мешо́к** төпһөҙ тоҡ ♦ **бездо́нная бо́чка** *шутл.*: 1) (*о человеке, который может много выпить, не хмелея*) араҡы мискәһе; 2) (*о чём-л., требующем неоднократных и неокупающихся затрат*) төпһөҙ мискә

**БЕЗДОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое юлһыҙ; **бездоро́жное вре́мя** юлһыҙ саҡ

**БЕЗДОРО́ЖЬЕ** *с* **1.** (*отсутствие дорог, а также плохое состояние дороги*) юлһыҙлыҡ, юлдың насарлығы **2.** (*распутица*) юл өҙөлөү, өҙәрем; **осе́ннее бездоро́жье** көҙгө өҙәрем

**БЕЗДОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое килемһеҙ, төшөмһөҙ; **бездохо́дное хозя́йство** килемһеҙ хужалыҡ

**БЕЗДУ́МНЫЙ,** -ая, -ое уйлап-нитеп тормаған, уйһыҙ, ғәмһеҙ, вайымһыҙ; **безду́мное отноше́ние** ғәмһеҙ мөнәсәбәт

**БЕЗДУ́МЬЕ** *с* ғәмһеҙлек, вайымһыҙлыҡ

**БЕЗДУ́ШИЕ** *с* ҡаты күңеллелек, рәхимһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ; **прояви́ть безду́шие** шәфҡәтһеҙлек күрһәтеү

**БЕЗДУ́ШНОСТЬ** *ж* ҡаты күңеллелек, рәхимһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ

**БЕЗДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лишённый чуткости, бессердечный*) ҡаты күңелле, миһырбанһыҙ (*кеше*) **2.** (*не выражающий живого чувства, холодный*) һалҡын, дәртһеҙ; **безду́шная игра́ актёров** актёрҙарҙың дәртһеҙ уйнауы **3.** *уст.* йәнһеҙ, үле; **безду́шное те́ло** үле кәүҙә

**БЕЗДЫ́МНЫЙ,** -ая, -ое төтөнһөҙ, төтөн сығармай торған; **безды́мный по́рох** төтөнһөҙ дары

**БЕЗДЫХА́ННЫЙ,** -ая, -ое йәнһеҙ, үле; **бездыха́нный конь** үле ат

**БЕЗЕ́** *с нескл.* безе (*купертелгән йомортҡа ағы менән шәкәрҙән бешерелгән тәм-том*)

**БЕЗЖА́ЛОСТНО** *нареч.* аяуһыҙ (рәүештә), йәлләмәй, ҡыҙғанмай; **безжа́лостно бить** йәлләмәй һуғыу (туҡмау)

**БЕЗЖА́ЛОСТНОСТЬ** *ж* аяуһыҙлыҡ, рәхимһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ; **прояви́ть безжа́лостность** рәхимһеҙлек күрһәтеү

**БЕЗЖА́ЛОСТНЫЙ,** -ая, -ое аяуһыҙ, рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ, миһырбанһыҙ, ҡанһыҙ, ҡаты; **безжа́лостный челове́к** рәхимһеҙ кеше

**БЕЗЖИ́ЗНЕННОСТЬ** *ж* йәнһеҙлек, йәнһеҙ (үле) булыу; **безжи́зненность взгля́да** ҡараштың йәнһеҙ булыуы

**БЕЗЖИ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*мёртвый*) йәнһеҙ, үле, үлгән; **безжи́зненное те́ло** үле кәүҙә **2.** (*пустынный, без признаков жизни*) йән эйәһе булмаған, йәнһеҙ, буш; **безжи́зненная степь** йән эйәһе булмаған дала **3.** (*невыразительный*) һүнгән, дәртһеҙ; **безжи́зненный взгляд** һүнгән ҡараш

**БЕЗЗАБО́ТНОСТЬ** *ж* **1.** (*беспечность*) ғәмһеҙлек, вайымһыҙлыҡ **2.** (*отсутствие забот*) мәшәҡәтһеҙлек, мәшәҡәт булмау, хәстәрһеҙлек

**БЕЗЗАБО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*беспечный*) ғәмһеҙ, вайымһыҙ, хәстәрһеҙ, ҡайғыһыҙ; **беззабо́тный челове́к** ғәмһеҙ кеше **2.** (*свободный от забот*) мәшәҡәтһеҙ, борсоуһыҙ, ҡайғыһыҙ; **беззабо́тная жизнь** мәшәҡәтһеҙ тормош

**БЕЗЗАВЕ́ТНОСТЬ** *ж* фиҙаҡәрлек, үҙен-үҙе аямау

**БЕЗЗАВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое йәнен ҡыҙғанмаған, үҙ-үҙен аямай торған, фиҙаҡәр; **беззаве́тная хра́брость** фиҙаҡәр батырлыҡ

**БЕЗЗАКО́НИЕ** *с* **1.** (*отсутствие законности*) законһыҙлыҡ; **борьба́ с беззако́нием** законһыҙлыҡ менән көрәш **2.** (*незаконный поступок*) законға ҡаршы эш итеү, законға ҡаршы эш, законһыҙ эш; **соверша́ть беззако́ния** законға ҡаршы эш ҡылыу

**БЕЗЗАКО́ННИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* законһыҙ эш итеү (ҡылыу)

**БЕЗЗАКО́ННОСТЬ** *ж* законһыҙлыҡ, законһыҙ эш; **беззако́нность де́йствия** эштең законһыҙлығы

**БЕЗЗАКО́ННЫЙ,** -ая, -ое законһыҙ, законға ҡаршы, законға һыймаған; **беззако́нный посту́пок** законға ҡаршы эш

**БЕЗЗАСТЕ́НЧИВОСТЬ** *ж* әрһеҙлек, оятһыҙлыҡ, битһеҙлек

**БЕЗЗАСТЕ́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое әрһеҙ, оятһыҙ, битһеҙ; **беззасте́нчивый лгун** оятһыҙ алдаҡсы

**БЕЗЗАЩИ́ТНОСТЬ** *ж* үҙен-үҙе яҡлай алмау, ярҙамһыҙ (яҡлаусыһыҙ) булыу

**БЕЗЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое үҙен-үҙе яҡлай алмаған, таянысы (терәге) булмаған, яҡлаусыһыҙ; **беззащи́тный челове́к** ярҙамһыҙ (яҡлаусыһыҙ) кеше

**БЕЗЗВЁЗДНЫЙ,** -ая, -ое йондоҙһоҙ; **беззвёздное не́бо** йондоҙһоҙ күк

**БЕЗЗВУ́ЧНОСТЬ** *ж* тауыш-тынһыҙ булыу, тауышһыҙлыҡ, өнһөҙлөк

**БЕЗЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тауыш-тынһыҙ, тауышһыҙ, тынһыҙ, өнһөҙ; **беззву́чный плач** тауышһыҙ илау

**БЕЗЗЕМЕ́ЛЬЕ** *с* ерһеҙлек, ергә мохтажлыҡ, ер аҙлыҡ

**БЕЗЗЕМЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ерһеҙ, ергә мохтаж; **безземе́льные крестья́не** ерһеҙ крәҫтиәндәр

**БЕЗЗЛО́БИЕ** *с* йомшаҡ күңеллелек, асыулы булмау

**БЕЗЗЛО́БНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ күңелле, асыуһыҙ, асыу йөрөтмәгән (тотмаған); **беззло́бный смех** асыуһыҙ көлөү

**БЕЗЗУ́БЫЙ,** -ая, -ое **1.** тешһеҙ, аҙ тешле; **беззу́бая стару́ха** тешһеҙ ҡарсыҡ **2.** *перен.* (*лишённый остроты, слабый*) йомшаҡ, көсһөҙ; **беззу́бая кри́тика** йомшаҡ тәнҡит

**БЕЗЛЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое урманһыҙ, урманға ярлы; **безле́сная степь** урманһыҙ дала

**БЕЗЛЕ́СЬЕ** *с* урманға ярлылыҡ, урманһыҙ ерҙәр

**БЕЗЛИ́КИЙ,** -ая, -ое үҙенсәлекһеҙ, төҫһөҙ, бер төрлө; **безли́кие дома́** бер төрлө үҙенсәлекһеҙ йорттар; **безли́кое произведе́ние** төҫһөҙ әҫәр

**БЕЗЛИ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое япраҡһыҙ, япрағы ҡойолған, шәрә; **безли́ственный лес** япраҡһыҙ урман

**БЕЗЛИ́СТНЫЙ** и **БЕЗЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое япраҡһыҙ, япрағы ҡойолған, ялантас, шәрә; **безли́стное де́рево** япрағы ҡойолған ағас

**БЕЗЛИ́ЧИЕ** *с* үҙенсәлекһеҙ булыу, шәхси һыҙаттар юҡлығы

**БЕЗЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бер кемгә лә ҡағылмаған, үҙенсәлеге булмаған, шәхсиәтһеҙ; **безли́чная кри́тика** бер кемгә лә ҡағылмаған тәнҡит **2.** *грам.* эйәһеҙ; **безли́чное предложе́ние** эйәһеҙ һөйләм

**БЕЗЛОША́ДНЫЙ,** -ая, -ое атһыҙ; **безлоша́дное хозя́йство** атһыҙ хужалыҡ

**БЕЗЛУ́НИЕ** *с* айҙың (ай яҡтыһының) булмауы

**БЕЗЛУ́ННЫЙ,** -ая, -ое айһыҙ; **безлу́нная ночь** айһыҙ төн

**БЕЗЛЮ́ДНОСТЬ** *ж* кешеләр юҡлыҡ, кеше булмау

**БЕЗЛЮ́ДЬЕ** *с* кеше юҡлыҡ, кешеләр булмау

**БЕЗЛЮ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кешеһеҙ, халыҡ аҙ йәшәй торған, кеше йәшәмәгән (тормаған); **безлю́дный о́стров** кеше йәшәмәгән утрау **2.** (*пустынный*) аулаҡ, кешеһеҙ, кеше йөрөмәй торған; **безлю́дная у́лица** аулаҡ урам

**БЕЗМЕ́Н** *м* бизмән

**БЕЗМЕ́РНО** *нареч.* самаһыҙ, саманан тыш, үтә (бик) ныҡ; **безме́рно уста́л** бик ныҡ арыны; **безме́рно сча́стлив** бик ныҡ бәхетле

**БЕЗМЕ́РНОСТЬ** *ж* самаһыҙ (сикһеҙ) булыу, самаһыҙлыҡ, сикһеҙлек

**БЕЗМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое сикһеҙ, самаһыҙ, саманан тыш ҙур (көслө), сиктән тыш ҙур (көслө); **безме́рная ра́дость** сикһеҙ ҙур шатлыҡ; **безме́рный гнев** сиктән тыш көслө асыу

**БЕЗМО́ЗГЛОСТЬ** *ж*; *разг.* мейеһеҙлек, аңралыҡ, миңрәүлек, маҡаулыҡ

**БЕЗМО́ЗГЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* мейеһеҙ, аңра, миңрәү, маҡау; **безмо́зглый челове́к** аңра кеше

**БЕЗМО́ЛВИЕ** *с* **1.** (*молчание*) өндәшмәү **2.** (*тишина*) тынлыҡ, һиллек, тауыш-тын булмау; **нару́шить безмо́лвие** тынлыҡты боҙоу

**БЕЗМО́ЛВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*молчаливый*) өндәшмәҫ, һөйләшмәҫ, һүҙһеҙ, өнһөҙ, өнһөҙ-тынһыҙ; **безмо́лвный челове́к** өнһөҙ-тынһыҙ кеше **2.** (*не сопровождаемый словами*) тауыш-тынһыҙ, һүҙһеҙ-ниһеҙ, өнһөҙ; **безмо́лвный вопро́с** өнһөҙ һорау; **безмо́лвный покло́н** һүҙһеҙ-ниһеҙ баш эйеү **3.** (*спокойный, тихий*) тын, һил, тып-тын; **безмо́лвная степь** тып-тын дала; **безмо́лвный лес** тып-тын урман

**БЕЗМО́ЛВСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** (*молчать*) өндәшмәү, бер һүҙ ҙә әйтмәү, һүҙ ҡатмау, һүҙһеҙ (телһеҙ) ҡалыу; **ба́бушка безмо́лвствовала** әбей бер һүҙ ҙә өндәшмәне **2.** (*быть тихим*) тауыш-тынһыҙ булыу, шып-шым (тып-тын) булыу; **приро́да безмо́лвствовала** тәбиғәт тып-тын ине

**БЕЗМОТО́РНЫЙ,** -ая, -ое моторһыҙ; **безмото́рная ло́дка** моторһыҙ кәмә

**БЕЗМУ́ЖНЯЯ,** -ее *прост.* ирһеҙ ҡалған, тол; **безму́жняя же́нщина** ирһеҙ ҡалған ҡатын

**БЕЗМЯТЕ́ЖНОСТЬ** *ж* тыныслыҡ, тыныс хәл, борсолмау

**БЕЗМЯТЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое борсолоуһыҙ, тып-тыныс, тыныс, ҡайғы-хәсрәтһеҙ; **безмяте́жный сон** тыныс йоҡо; **безмяте́жная жизнь** ҡайғы-хәсрәтһеҙ тормош

**БЕЗНАДЁЖНОСТЬ** *ж* өмөтһөҙлөк, ышаныс-һыҙлыҡ; **безнадёжность положе́ния** хәлдең өмөтһөҙлөгө

**БЕЗНАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое өмөтһөҙ, ышаныс-һыҙ; **безнадёжный больно́й** өмөтһөҙ ауырыу; **безнадёжный взгляд** өмөтһөҙ ҡараш

**БЕЗНАДЗО́РНОСТЬ** *ж* ҡараусыһыҙ (күҙәтеүсеһеҙ) булыу, бағыуһыҙлыҡ; **безнадзо́рность дете́й** балаларҙың ҡараусыһыҙ булыуы

**БЕЗНАДЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое ҡараусыһыҙ, күҙәтеүсеһеҙ; **безнадзо́рный ребёнок** ҡараусыһыҙ бала

**БЕЗНАКА́ЗАННОСТЬ** *ж* язаһыҙлык, язаһыҙ ҡалдырылыу; **безнака́занность просту́пка** енәйәттең язаһыҙ ҡалдырылыуы

**БЕЗНАКА́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое язаһыҙ, язаһыҙ ҡалдырылған; **безнака́занное преступле́ние** язаһыҙ ҡалдырылған енәйәт

**БЕЗНАЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡул аҡсаһыҙ, аҡсаһыҙ; **безнали́чный расчёт** ҡул аҡсаһыҙ иҫәпләшеү

**БЕЗНАЧА́ЛИЕ** *с* етәксеһеҙ булыу, власһыҙлыҡ, власть юҡлыҡ

**БЕЗНО́ГИЙ,** -ая, -ое **1.** аяҡһыҙ, аяғы өҙөлгән, аяҡһыҙ ҡалған; **безно́гий челове́к** аяҡһыҙ кеше **2.** *разг.* аяҡһыҙ, аяғы һынған, тояҡһыҙ, тояғы һынған; **безно́гий стол** тояҡһыҙ өҫтәл; **безно́гий дива́н** тояғы һынған диван

**БЕЗНО́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** танауһыҙ, танауһыҙ ҡалған **2.** *разг.* һеләге (мороно) булмаған, һемәкһеҙ, моронһоҙ; **безно́сый ча́йник** моронһоҙ сәйгүн (сәйнүк)

**БЕЗНРА́ВСТВЕННОСТЬ** *ж* әхлаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, оятһыҙлыҡ; **проявля́ть безнра́вственность** әҙәпһеҙлек күрһәтеү

**БЕЗНРА́ВСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое әхлаҡһыҙ, әҙәпһеҙ; **безнра́вственный челове́к** әхлаҡһыҙ кеше; **безнра́вственный посту́пок** әҙәпһеҙ ҡылыҡ

**БЕЗО** *предлог см.* **без**

**БЕЗОБИ́ДНОСТЬ** *ж* хәтер ҡалдырмаҫлыҡ (ҡалмаҫлыҡ) булыу, зарарһыҙ (зыянһыҙ) булыу; **безоби́дность шу́тки** шаярыуҙың хәтер ҡалдырмаҫлыҡ булыуы

**БЕЗОБИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое хәтер ҡалдырмаҫлыҡ (ҡалмаҫлыҡ), зыянһыҙ; **безоби́дная кри́тика** хәтер ҡалдырмаҫлыҡ тәнҡит; **безоби́дный челове́к** зыянһыҙ кеше

**БЕЗО́БЛАЧНОСТЬ** *ж* **1.** болотһоҙ, аяҙ булыу, аяҙлыҡ, асыҡлыҡ; **безо́блачность не́ба** күктең аяҙлығы **2.** *перен.* ҡайғы-хәсрәтһеҙ (хәүеф-хәтәрһеҙ) булыу, тыныс; **безо́блачность жи́зни** тормоштоң ҡайғы-хәсрәтһеҙ булыуы

**БЕЗО́БЛАЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** болотһоҙ, аяҙ, асыҡ; **безо́блачный день** аяҙ көн; **безо́блачное не́бо** болотһоҙ күк **2.** *перен.* ҡайғы-хәсрәтһеҙ, хәүеф-хәтәрһеҙ, яҡты, бәхетле; **безо́блачная жизнь** яҡты тормош

**БЕЗОБРА́ЗИЕ** *с* **1.** (*уродство*) йәмһеҙлек, шөкәтһеҙлек, килбәтһеҙлек **2.** (*отвратительное явление*) әшәкелек, насар ҡылыҡ, тәртипһеҙлек, ҡәбәхәтлек; **соверши́ть безобра́зие** әшәкелек эшләү; **что́ за безобра́зие!** был ниндәй тәртипһеҙлек!

**БЕЗОБРА́ЗИТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*искажать, делать некрасивым*) йәмһеҙләү, шөкәтһеҙ (килбәтһеҙ) итеп күрһәтеү; **пла́тье безобра́зит фигу́ру** күлдәк кәүҙәне килбәтһеҙ итеп күрһәтә **2.** *прост. см.* **безобра́зничать**

**БЕЗОБРА́ЗНИК** *м* и **БЕЗОБРА́ЗНИЦА** *ж*; *разг.* тыйнаҡһыҙ, тәртипһеҙ, әшәке

**БЕЗОБРА́ЗНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* тыйнаҡһыҙланыу, тәртипһеҙләнеү, тәртипһеҙ (хаяһыҙ) ҡыланыу, тәртипһеҙлек ҡылыу (эшләү)

**БЕЗОБРА́ЗНОСТЬ** *ж* тәртипһеҙлек, әшәкелек, тыйнаҡһыҙлыҡ; **безобра́зность поведе́ния** ҡылыҡтың әшәкелеге

**БЕЗО́БРАЗНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* (*не имеющий чёткого облика, расплывчатый*) тарҡау; **безо́бразные мы́сли** тарҡау фекерҙәр

**БЕЗОБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*уродливый*) йәмһеҙ, шөкәтһеҙ, шыҡһыҙ; **безобра́зная вне́шность** шөкәтһеҙ ҡиәфәт **2.** (*возмутительный, отвратительный*) тәртипһеҙ, әшәке, насар; **безобра́зный посту́пок** әшәке ҡылыныш

**БЕЗОГЛЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* **1.** (*необозримый*) күҙ күреме етмәгән, икһеҙ-сикһеҙ, иге-сиге булмаған; **безогля́дное простра́нство** икһеҙ-сикһеҙ киңлек **2.** (*совершаемый без оглядки, без раздумий, рассуждений*) дыуамал, алдын-артын уйламай эшләнгән; **безогля́дная сме́лость** дыуамал ҡыйыулыҡ

**БЕЗОГОВО́РОЧНОСТЬ** *ж* бер һүҙһеҙ (ҡаршылыҡһыҙ) булыу

**БЕЗОГОВО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое бер һүҙһеҙ, бер ниндәй ҙә шарт ҡуйылмайынса; **безогово́рочное согла́сие** бер һүҙһеҙ риза булыу; **безогово́рочная капитуля́ция** бер һүҙһеҙ капитуляция яһау

**БЕЗОПА́СНОСТЬ** *ж* хәүеф-хәтәрһеҙлек, именлек; **междунаро́дная безопа́сность** халыҡ-ара именлек; **охра́на госуда́рственной безопа́сности** дәүләт именлеген һаҡлау; **те́хника безопа́сности** хәүефһеҙлек техникаһы; **безопа́сность у́личного движе́ния** урам хәрәкәтенең хәүефһеҙлеге

**БЕЗОПА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡурҡынысһыҙ, хәүеф-хәтәрһеҙ; **безопа́сное ме́сто** хәүеф-хәтәрһеҙ урын **2.** зарарһыҙ, зыянһыҙ; **безопа́сный препара́т** зыянһыҙ препарат **3.** *уст.* (*находящийся вне опасности*) имен, тыныс

**БЕЗОРУ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡоралһыҙ, ҡоралланмаған; **безору́жный челове́к** ҡоралһыҙ кеше **2.** *перен.* көсһөҙ, дарманһыҙ; **в э́том спо́ре он оказа́лся безору́жным** был бәхәстә ул көсһөҙ булып сыҡты

**БЕЗОСНОВА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* нигеҙһеҙлек, төпһөҙлөк

**БЕЗОСНОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое нигеҙһеҙ, төпһөҙ; **безоснова́тельное се́тование** нигеҙһеҙ һуҡраныу

**БЕЗОСТАНО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ; **безостано́вочное движе́ние** өҙлөкһөҙ хәрәкәт

**БЕЗО́СТЫЙ,** -ая, -ое (*о злаках*) ҡылсыҡһыҙ; **безо́стая пшени́ца** ҡылсыҡһыҙ бойҙай

**БЕЗОТВЕ́ТНОСТЬ** *ж* (*кротость, покорность*) баҫалҡылыҡ, баҫымсаҡлыҡ, үтә йыуашлыҡ; **безотве́тность хара́ктера** холоҡтоң баҫалҡылығы

**БЕЗОТВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яуапһыҙ, яуапһыҙ ҡалдырылған; **безотве́тная любо́вь** яуапһыҙ мөхәббәт **2.** (*кроткий, покорный*) баҫалҡы, баҫымсаҡ, тауышһыҙ-тынһыҙ, йыуаш; **безотве́тный челове́к** йыуаш кеше

**БЕЗОТВЕ́ТСТВЕННОСТЬ** *ж* яуапһыҙлыҡ; **прояви́ть безотве́тственность** яуапһыҙлыҡ күрһәтеү

**БЕЗОТВЕ́ТСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое яуапһыҙ; **безотве́тственное отноше́ние к де́лу** эшкә яуапһыҙ мөнәсәбәт

**БЕЗОТВЯ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*неотвязный*) баштан (уйҙан, күңелдән) сыҡмаған, бәйләнсек; **безотвя́зная мело́дия** баштан сыҡмаған көй; **безотвя́зные мы́сли** бәйләнсек уйҙар

**БЕЗОТГОВО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡаршылыҡһыҙ, бәхәсһеҙ, тотҡарлыҡһыҙ, бер һүҙһеҙ; **де́ло тре́бует безотгово́рочного исполне́ния** эш бер һүҙһеҙ үтәүҙе талап итә

**БЕЗОТКА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*никогда не отказывающийся от поручения, выполнения просьбы*) тыңлаулы, тыңлаусан, күндәм, ҡарыуһыҙ; **безотка́зный челове́к** тыңлаусан кеше **2.** (*происходящий без перебоев, остановок*) бер тотҡарлыҡһыҙ, өҙлөкһөҙ, бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ (бер туҡтауһыҙ) эшләгән (эшләй торған); **безотка́зный механи́зм** өҙлөкһөҙ эшләй торған механизм

**БЕЗОТЛАГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кисектергеһеҙ, кисектереүһеҙ, ашығыс; **безотлага́тельные ме́ры** кисектергеһеҙ саралар

**БЕЗОТЛУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое урынынан китмәгән, урынында булған; **безотлу́чный сто́рож** һәр ваҡыт урынында торған ҡарауылсы

**БЕЗОТНОСИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* сағыштырғыһыҙ, бер нәмәгә лә бәйләмәй, иҫәпкә алмаған, ҡарамаҫтан

**БЕЗОТРА́ДНОСТЬ** *ж* ҡыуанысһыҙ (шатлыҡһыҙ) булыу; **безотра́дность существова́ния** ҡыуанысһыҙ йәшәү

**БЕЗОТРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡыуанысһыҙ, шатлыҡһыҙ, күңелһеҙ; **безотра́дная жизнь** ҡыуанысһыҙ тормош

**БЕЗОТРЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое өҙлөкһөҙ, туҡтауһыҙ; **безотры́вное обуче́ние** өҙлөкһөҙ уҡыу

**БЕЗОТЦО́ВЩИНА** *ж* атайһыҙлыҡ, атаһыҙ үҫеү

**БЕЗОТЧЁТНОСТЬ** *ж* **1.** (*бессознательность*) аңһыҙлыҡ, ихтыярһыҙлыҡ; **безотчётность чувств** хистәрҙең ихтыярһыҙлығы **2.** (*отсутствие контроля*) контролһеҙлек, яуапһыҙ булыу; **безотчётность в рабо́те** эштә яуапһыҙ булыу

**БЕЗОТЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*бессознательный, невольный*) ихтыярһыҙ (аңһыҙлыҡ менән) эшләгән, сәбәпһеҙ, сәбәпһеҙ-ниһеҙ, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән, ирекһеҙҙән, сараһыҙҙан; **безотчётный смех** сәбәпһеҙ көлөү; **безотчётная трево́га** сәбәпһеҙ-ниһеҙ шомланыу **2.** (*бесконтрольный*) отчётһыҙ, күҙәткеһеҙ, контролһеҙ; **безотчётное распределе́ние де́нег** аҡсаны отчётһыҙ бүлеү

**БЕЗОШИ́БОЧНОСТЬ** *ж* дөрөҫлөк, хатаһыҙ булыу, хатаһыҙлыҡ; **безоши́бочность вы́водов** һығымталарҙың дөрөҫлөгө

**БЕЗОШИ́БОЧНЫЙ,** -ая, -ое дөрөҫ, хатаһыҙ; **безоши́бочный расчёт** дөрөҫ иҫәпләшеү (иҫәпләү)

**БЕЗРАБО́ТИЦА** *ж* эшһеҙлек, эш юҡлыҡ, эш булмау

**БЕЗРАБО́ТНЫЙ,** -ая, -ое эшһеҙ, эшһеҙ ҡалған; **безрабо́тный челове́к** эшһеҙ кеше

**БЕЗРА́ДОСТНОСТЬ** *ж* шатлыҡһыҙ (ҡыуанысһыҙ, күңелһеҙ, эс бошорлоҡ) булыуы; **безра́достность жи́зни** тормоштоң күңелһеҙ булыуы

**БЕЗРА́ДОСТНЫЙ,** -ая, -ое бер шатлыҡһыҙ, ҡыуанысһыҙ, күңелһеҙ; **безра́достная жизнь** ҡыуанысһыҙ тормош

**БЕЗРАЗДЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* бөтөн көйө (тулы) булыу, бүленмәү, бүленә алмау; **безразде́льность иму́щества** мөлкәттең бүленмәүе

**БЕЗРАЗДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бүленмәй торған, бүленмәҫ, тулы; **безразде́льное иму́щество** бүленмәй торған мөлкәт; **безразде́льная власть** тулы хакимлыҡ

**БЕЗРАЗЛИ́ЧИЕ** *с* ғәмһеҙлек, барыбер булыу, иҫ китмәү, ҡыҙыҡһынмау, битарафлыҡ, һалҡын ҡараш, вайымһыҙлыҡ; **безразли́чие ко всему́** һәр нәмәгә лә вайымһыҙлыҡ

**БЕЗРАЗЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*равнодушный*) вайымһыҙ, ғәмһеҙ; **безразли́чный челове́к** вайымһыҙ кеше **2.** *разг.* (*несущественный*) иҫе китмәгән, ҡыҙыҡһынмаған, барыбер булған, әһәмиәтһеҙ; **он безразли́чен к спо́рту** уның спортҡа иҫе китмәй

**БЕЗРАЗМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* билдәле генә үлсәме булмаған, үлсәмһеҙ; **безразме́рные чулки́** үлсәмһеҙ ойоҡ; **безразме́рные носки́** үлсәмһеҙ ойоҡбаш

**БЕЗРАССУ́ДОЧНОСТЬ** *ж* аҡылһыҙлыҡ, алабарманлыҡ, дыуамаллыҡ; **безрассу́дочность поведе́ния** ҡылыҡтағы алабарманлыҡ

**БЕЗРАССУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое уйламай (дыуамаллыҡ менән) эшләнгән (ҡылынған), дыуамал, аҡылһыҙ; **безрассу́дный посту́пок** уйламай ҡылынған эш; **безрассу́дная хра́брость** дыуамал батырлыҡ

**БЕЗРАССУ́ДСТВО** *с* аҡылһыҙлыҡ, дыуамаллыҡ, алабарманлыҡ

**БЕЗРАСЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое иҫәпһеҙ; **безрасчётная тра́та де́нег** аҡсаны иҫәпһеҙ тотоу

**БЕЗРЕЗУЛЬТА́ТНОСТЬ** *ж* нәтижәһеҙлек, һөҙөмтәһеҙ булыу, уңышһыҙлыҡ; **безрезульта́тность о́пыта** тәжрибәнең һөҙөмтәһеҙ булыуы

**БЕЗРЕЗУЛЬТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое нәтижәһеҙ, һөҙөмтәһеҙ, уңышһыҙ; **безрезульта́тные по́иски** һөҙөмтәһеҙ эҙләнеүҙәр

**БЕЗРЕ́ЛЬСОВЫЙ,** -ая, -ое (*о транспорте*) рельсһыҙ, рельсһыҙ йөрөй торған; (*о дорогах*) рельс һалынмаған

**БЕЗРО́ГИЙ,** -ая, -ое тупал, мөгөҙһөҙ, мүклә; **безро́гая коро́ва** тупал һыйыр

**БЕЗРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не имеющий родственников*) ҡәрҙәш-ырыуһыҙ, туған-тыумасаһыҙ; **безро́дный челове́к** туған-тыумасаһыҙ кеше **2.** *устар.* (*неродовитый*) заты (нәҫеле) данлыҡлы булмаған, затһыҙ; **безро́дный дворяни́н** затһыҙ дворянин

**БЕЗРО́ПОТНОСТЬ** *ж* күндәмлек, зарланмау, тыңлаусанлыҡ; буйһоноусанлыҡ

**БЕЗРО́ПОТНЫЙ,** -ая, -ое күндәм, зарланмаған, буйһоноусан, тыңлаусан; **безро́потный челове́к** тыңлаусан кеше

**БЕЗРУКА́ВКА** *ж* еңһеҙ кейем; **трикота́жная безрука́вка** бәйләнгән еңһеҙ кофта

**БЕЗРУКА́ВНЫЙ,** -ая, -ое еңһеҙ

**БЕЗРУ́КИЙ,** -ая, -ое ҡулһыҙ, сулаҡ; **безру́кий челове́к** ҡулһыҙ кеше **2.** *перен.*, *разг.* (*неловкий, неумелый в работе*) ҡулабаш, белдекһеҙ, һәләтһеҙ; **безру́кий руководи́тель** һәләтһеҙ етәксе

**БЕЗРЫ́БЬЕ** *с* балыҡ юҡлығы, балыҡ етмәү ♦ **на безры́бье и рак ры́ба** ит булмағанда үпкә лә аш

**БЕЗУБЫ́ТОЧНОСТЬ** *ж* зыянһыҙ, зыян күрмәү, сығымдар артмау

**БЕЗУБЫ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое зыянлыҡһыҙ, зарар (зыян) килтермәгән (килтермәй торған); **безубы́точное предприя́тие** зыянлыҡһыҙ предприятие

**БЕЗУДА́РНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* баҫымһыҙ; **безуда́рные гла́сные** баҫымһыҙ һуҙынҡылар; **безуда́рный слог** баҫымһыҙ ижек

**БЕЗУ́ДЕРЖНЫЙ** и *уст.* **БЕЗУДЕ́РЖНЫЙ,** -ая, -ое тыйылғыһыҙ (тыйып алғыһыҙ), тотонаҡһыҙ, ярһыу; **безу́держный смех** тыйылғыһыҙ көлөү; **безу́держная горя́чность** ярһыу дыуамаллыҡ

**БЕЗУКОРИ́ЗНЕННОСТЬ** *ж* кәмселекһеҙ, тел (һүҙ) тейҙермәҫлек булыу, яҡшы (һәйбәт) булыу, яҡшылыҡ, һәйбәтлек; **безукори́зненность хара́ктера** холоҡтоң яҡшылығы; **безукори́зненность рабо́ты** эштең һәйбәтлеге

**БЕЗУКОРИ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое кәмселеге булмаған, кәмселекһеҙ, тел (һүҙ) тейҙергеһеҙ, яҡшы, һәйбәт; **безукори́зненное поведе́ние** яҡшы тәртип; **безукори́зненная рабо́та** тел тейҙергеһеҙ, һәйбәт эш

**БЕЗУ́МЕЦ** *м* **1.** *уст.* (*сумасшедший*) тиле, диуана, аҡылдан яҙған, иҫәр **2.** (*безрассудный человек*) дыуамал, башһыҙ кеше, аҡылһыҙ

**БЕЗУ́МИЕ** *с* **1.** *уст.* (*сумасшествие*) диуаналыҡ, иҫәрлек **2.** (*крайнее безрассудство*) дыуамаллыҡ, башһыҙлыҡ, аҡылһыҙлыҡ ♦ **до безу́мия (люби́ть)** үлеп, шашып (яратыу)

**БЕЗУ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*сумасшедший*) тиле, диуана, аҡылдан яҙған (*кеше*) **2.** (*крайне безрассудный*) уйламай эшләгән, дыуамал, башһыҙ, аҡылһыҙ, ахмаҡ; **безу́мная отва́га** дыуамал батырлыҡ **3.** *разг.* (*очень сильный*) саманан (сиктән) тыш, иҫ киткес ныҡ (көслө); **безу́мная уста́лость** саманан тыш арыу

**БЕЗУМО́ЛЧНЫЙ,** -ая, -ое өҙлөкһөҙ, туҡтауһыҙ, тынмаҫ; **безумо́лчный шум** тынмаҫ шау-шыу

**БЕЗУ́МСТВО** *с см.* **безу́мие**

**БЕЗУ́МСТВОВАТЬ** *несов.* аҡылдан шашыу, аҡылды юғалтыу, ҡотороноу, дыуамалланыу, дыу килеү

**БЕЗУПРЕ́ЧНОСТЬ** *ж* тел (һүҙ) тейҙермәҫлек булыу, һәйбәт (яҡшы) булыу; **безупре́чность поведе́ния** тәртиптең тел тейҙермәҫлек булыуы

**БЕЗУПРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тел (һүҙ) тейҙермәҫлек, бик яҡшы, һәйбәт, маҡтауға лайыҡ; **безупре́чная рабо́та** бик яҡшы эш; **безупре́чное поведе́ние** тел тейҙермәҫлек тәртип

**БЕЗУСЛО́ВНО 1.** *нареч.* һис шикһеҙ, бер һүҙһеҙ; **он безусло́вно хоро́ший руководи́тель** ул һис шикһеҙ һәйбәт етәксе **2.** *в знач. вводн. сл.* әлбиттә, һис шикһеҙ; **безусло́вно, он пришёл пе́рвым** әлбиттә, ул беренсе булып килде

**БЕЗУСЛО́ВНОСТЬ** *ж* шарттар менән сикләнмәгән булыу, шарт ҡуйылмаған булыу

**БЕЗУСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое һис (бер) һүҙһеҙ, тулы, шартһыҙ; **безусло́вное повинове́ние** бер һүҙһеҙ буйһоноу; **безусло́вное дове́рие** тулы ышаныс ♦ **безусло́вные рефле́ксы** шартһыҙ рефлекстар

**БЕЗУСПЕ́ШНОСТЬ** *ж* нәтижәһеҙлек, уңышһыҙлыҡ, һөҙөмтәһеҙлек; **безуспе́шность о́пыта** тәжрибәнең уңышһыҙлығы

**БЕЗУСПЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое нәтижәһеҙ, уңышһыҙ, һөҙөмтәһеҙ; **безуспе́шное путеше́ствие** уңышһыҙ сәйәхәт

**БЕЗУСТА́ННЫЙ,** -ая, -ое өҙлөкһөҙ, арыу-талыуһыҙ, бер туҡтауһыҙ; **безуста́нная рабо́та** өҙлөкһөҙ эш

**БЕЗУ́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** мыйыҡһыҙ, мыйыҡ (ғы) сыҡмаған; **безу́сый солда́т** мыйыҡһыҙ һалдат **2.** *перен.* бик йәш

**БЕЗУТЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡара ҡайғылы, йыуатҡыһыҙ (*кеше*); **безуте́шная мать** ҡара ҡайғылы әсә; **быть безуте́шным** ҡайғынан арына алмау **2.** йыуатып булмай торған; **безуте́шное го́ре** йыуатып булмай торған ҡайғы

**БЕЗУ́ХИЙ,** -ая, -ое ҡолаҡһыҙ

**БЕЗУЧА́СТИЕ** *с* вайымһыҙлыҡ, вайымһыҙ (күңел һалмай) ҡарау, иҫ китмәү

**БЕЗУЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое вайымһыҙ, күңел бирмәгән, иҫе китмәгән; **безуча́стное отноше́ние** вайымһыҙ мөнәсәбәт; **безуча́стный взгляд** вайымһыҙ ҡараш

**БЕЗЪ...** *приставка см.* **без...**

**БЕЗЪЯ́ДЕРНЫЙ: безъя́дерная зо́на** ядро ҡоралһыҙ зона (*атом ҡоралы эшләү, һаҡлау һәм ҡулланыу тыйылған зона*)

**БЕЗЪЯЗЫ́КИЙ** и **БЕЗЪЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое телһеҙ, теле юҡ

**БЕЗЫДЕ́ЙНОСТЬ** *ж* идеяһыҙлыҡ, фекерһеҙлек

**БЕЗЫДЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое идеяһыҙ, фекерһеҙ; **безыде́йное произведе́ние** идеяһыҙ әҫәр

**БЕЗЫЗВЕ́СТНОСТЬ** *ж* **1.** *уст.* (*неизвестность*) билдәһеҙлек **2.** (*отсутствие сведений*) хәбәр булмау, хәбәрһеҙлек

**БЕЗЫЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое билдәһеҙ, таныш булмаған

**БЕЗЫМЯ́ННЫЙ** и **БЕЗЫМЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** исемһеҙ, исем ҡушылмаған, исеме билдәһеҙ, исеме булмаған; **безымя́нная ре́чка** исемһеҙ йылға **2.** (*не сохранивший имени творца, автора*) авторҙың исеме һаҡланмаған, авторһыҙ, аноним; **безымённое произведе́ние** авторһыҙ (аноним) әҫәр ♦ **безымя́нная моги́ла** билдәһеҙ ҡәбер; **безымя́нный па́лец** сығанаҡ бармаҡ

**БЕЗЫНИЦИАТИ́ВНОСТЬ** *ж* инициативаһыҙлыҡ, инициативаһы булмау

**БЕЗЫНИЦИАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое инициативаһыҙ, инициативаһы булмаған; **безынициати́вный рабо́тник** инициативаһыҙ хеҙмәткәр

**БЕЗЫНТЕРЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡ (ҡыҙығы) булмаған; **безынтере́сная рабо́та** ҡыҙығы булмаған эш

**БЕЗЫСКУ́ССТВЕННОСТЬ** *ж* ябайлыҡ, тәбиғилек; **безыску́сственность ре́чи** телмәр ябайлығы

**БЕЗЫСКУ́ССТВЕННЫЙ,** -ая, -ое тәбиғи, яһалма түгел; **безыску́сственная красота́** тәбиғи матурлыҡ

**БЕЗЫСХО́ДНОСТЬ** *ж* ҡотолғоһоҙ (төҙәлгеһеҙ) булыу, ҡотолғоһоҙлоҡ, сараһыҙлыҡ; **безысхо́дность положе́ния** хәлдең ҡотолғоһоҙ булыуы

**БЕЗЫСХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡотолғоһоҙ, бөтмәҫ, йырып сыҡҡыһыҙ; **безысхо́дная тоска́** ҡотолғоһоҙ һағыш; **безысхо́дное го́ре** бөтмәҫ ҡайғы

**БЕЙ** *м* (*титул мелких феодальных правителей в странах Ближнего и Среднего Востока*) бей

**БЕ́ЙКА** *ж*; *разг.* әҙеп; **вы́пустить бе́йку** әҙебен ебәреү (оҙайтыу); **наши́ть бе́йку** әҙеп һалыу

**БЕК I** *м см.* **бей**

**БЕК II** *м*; *спорт. см.* **защи́тник** 3

**БЕКА́Р** *м*; *муз.* бекар (*нота билдәһе*)

**БЕКА́С** *м* һаралйын (*һаҙ ҡошо*)

**БЕКАСИ́ННИК** *м*; *охот.* дороп (*ваҡ ҡошҡорт атыу өсөн*)

**БЕКАСИ́НЫЙ,** -ая, -ое һаралйын ...ы; **бекаси́ное гнездо́** һаралйын ояһы; **бекаси́ный вы́водок** бер оя һаралйын себештәре

**БЕКЕ́ША** *ж* бекеш (*бөрмә билле ирҙәр пальтоһы*)

**БЕКО́Н** *м* бекон (*ыҫлап ҡаҡланған йәки аҙ ғына тоҙланған сусҡа ите*)

**БЕКО́ННЫЙ,** -ая, -ое бекон ...ы

**БЕЛЁК** *м* тюлень балаһы

**БЕЛЕНА́** *ж* тилебәрән ♦ **белены́ объе́лся** *груб.*, *прост.* тилебәрән орлоғо ашаныңмы, аҡылдан шаштыңмы

**БЕЛЕННО́Й,** -ая, -ое тилебәрән ...ы; **беленно́е се́мя** тилебәрән орлоғо; **беленно́е ма́сло** тилебәрән майы

**БЕЛЁНЫЙ,** -ая, -ое ағартылған, аҡҡа буялған, аҡланған; **белёная стена́** ағартылған стена; **белёный холст** ағартылған киндер

**БЕЛЁСЫЙ,** -ая, -ое аҡһыл, һорғолт аҡ, тоноҡ аҡ; **белёсые бро́ви** аҡһыл ҡаш; **белёсый тума́н** аҡһыл томан

**БЕЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*виднеться — о чём-л. белом*) ағарып күренеү, ағарып тороу (ятыу); **вдали́ беле́ет па́рус** алыҫта елкән ағарып күренә **2.** (*становиться белым*) ағарыу, аҡ төҫкә инеү; **лицо́ на́чало беле́ть** бите (йөҙө) ағара башланы

**БЕЛЕ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ағарып күренеү; **че́й-то плато́к беле́лся в темноте́** ҡараңғыла кемдеңдер яулығы ағарып күренде

**БЕ́ЛИ** *мн.*; *мед.* аҡ килеү (*ҡатын-ҡыҙҙың енси ауырыуы*)

**БЕЛИБЕРДА́** *ж*; *разг.* юҡ-бар һүҙ, туҙға яҙмаған хәбәр, сафсата, һүҙ бутҡаһы

**БЕЛИЗНА́** *ж* аҡлыҡ; **белизна́ сне́га** ҡарҙың аҡлығы; **белизна́ зубо́в** тештәрҙең аҡлығы

**БЕЛИ́ЛА** *мн.* **1.** аҡ буяу; **свинцо́вые бели́ла** ҡурғашлы аҡ буяу; **ци́нковые бели́ла** цинкылы аҡ буяу **2.** кершән; **покры́ть лицо́ бели́лами** биткә кершән яғыу

**БЕЛИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ағарта торған, ағартыу өсөн ҡулланылған; **бели́льный раство́р** ағарта торған иҙмә

**БЕЛИ́ЛЬНЯ** *ж* ағартыу урыны (*цех йәки бүлмә*)

**БЕЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** ағартыу, аҡлау; **бели́ть избу́** өй аҡлау; **бели́ть потоло́к** түшәм ағартыу **2.** һөртөү; **бели́ть лицо́** биткә кершән һөртөү **3.** аҡ төҫкә индереү, ағартыу (*епте, туҡыманы*); **бели́ть холсты́** киндер ағартыу

**БЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** кершән һөртөнөү **2.** *страд. от* **бели́ть**

**БЕ́ЛИЧИЙ,** -ья, -ье **1.** тейен ...ы; **бе́личья шку́рка** тейен тиреһе; **бе́личье гнездо́** тейен ояһы **2.** (*сделанный из меха белки*) тейен, тейен тиреһенән тегелгән; **бе́личий воротни́к** тейен яға; **бе́личья шу́ба** тейен тун

**БЕ́ЛКА** *ж* тейен ♦ **как бе́лка в колесе́ верте́ться (кружи́ться, крути́ться)** орсоҡ кеүек әйләнеү, туҡтауһыҙ эш, мәшәҡәт менән сабыулау, өтәләнеп йөрөү, көн-төн йүгереү

**БЕЛКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *биол.*, *хим.* **1.** аҡһым ...ы; **белко́вое вещество́** аҡһым матдә **2.** аҡһымлы; **белко́вые корма́** аҡһымлы аҙыҡтар

**БЕЛЛАДО́ННА** *ж* **1.** *бот.* эт еләге **2.** (*лекарство*) белладонна

**БЕЛЛЕТРИ́СТ** *м* беллетрист (*яҙыусы*)

**БЕЛЛЕТРИ́СТИКА** *ж* беллетристика, матур (нәфис) әҙәбиәт (*проза менән яҙылған әҙәбиәт*)

**БЕЛЛЕТРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое беллетристик; **беллетристи́ческое произведе́ние** беллетристик әҫәр

**БЕЛОБИЛЕ́ТНИК** *м*; *разг.* аҡ билеты булған, аҡ билетлы (*хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылған кеше*)

**БЕЛОБО́КИЙ,** -ая, -ое ҡабырғаһы аҡ булған, аҡ ҡабырғалы; **белобо́кая соро́ка** аҡ ҡабырғалы һайыҫҡан

**БЕЛОБОРО́ДЫЙ,** -ая, -ое аҡ (сал) һаҡаллы; **белоборо́дый стари́к** аҡ һаҡаллы ҡарт

**БЕЛОБРЫ́СЫЙ,** -ая, -ое *разг.* аҡшар; **белобры́сый ма́льчик** аҡшар малай

**БЕЛОВИ́К** *м* аҡлама, аҡҡа (яҙылған) күсерелгән ҡулъяҙма

**БЕЛОВО́Й,** -ая, -ое аҡҡа (яҙылған) күсерелгән; **белово́й экземпля́р ру́кописи** ҡулъяҙманың аҡҡа күсерелгән нөсхәһе

**БЕЛОГВАРДЕЕ́Ц** *м* аҡ гвардеец, аҡ гвардиясы

**БЕЛОГВАРДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое аҡ гвардеецтар ...ы, аҡ гвардиясылар ...ы; **белогварде́йский отря́д** аҡ гвардиясылар отряды

**БЕЛОГЛА́ЗКА** *ж* **1.** (*птица*) аҡҡаш турғай **2.** (*рыба*) сәгер балыҡ

**БЕЛОГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое аҡ сәсле, аҡ башлы; **белоголо́вый мальчи́шка** аҡ сәсле малай

**БЕЛОДЕРЕ́ВЕЦ** *м* ағас оҫтаһы, столяр

**БЕЛОДЕРЕ́ВЩИК** *м см.* **белодере́вец**

**БЕЛОЗО́Р** *м* йондоҙ үлән

**БЕЛО́К** *м* **1.** (*прозрачная часть яйца*) аҡ; **взбить бело́к** йомортҡа ағын күпертеү **2.** (*непрозрачная, белая оболочка глаза*) аҡ; **белки́ глаз** күҙ ағы **3.** *биол., хим.* аҡһым

**БЕЛОКА́МЕННЫЙ,** -ая, -ое аҡ ташлы, аҡ таштан һалынған; **белока́менные пала́ты** аҡ таштан һалынған һарайҙар

**БЕЛОКРО́ВИЕ** *с*; *мед.* аҡ ҡанлылыҡ, лейкоз, лейкемия (*ҡан күҙәнәктәрен барлыҡҡа килтереүсе туҡыманы һ.б. ағзаларҙы зарарлаусы етди ауырыу*)

**БЕЛОКУ́РЫЙ,** -ая, -ое аҡһыл һары (һарғылт, етен) сәсле; **белоку́рая де́вочка** етен сәсле ҡыҙыҡай

**БЕЛОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ое аҡ йөҙлө (битле); **белоли́цый мальчуга́н** аҡ йөҙлө малай

**БЕЛОЛО́БЫЙ,** -ая, -ое ҡашҡа; **белоло́бый щено́к** ҡашҡа көсөк; **белоло́бый бара́н** ҡашҡа тәкә

**БЕЛОРУ́ССКИЙ,** -ая, -ое белорус ...ы, Беларусь...ы; **белору́сский язы́к** белорус теле; **белору́сская литерату́ра** белорус әҙәбиәте

**БЕЛОРУ́СЫ** *мн.* белорустар, белорус халҡы // *ед.* **белору́с** *м* белорус ир-аты; **белору́ска** *ж* белорус ҡатын-ҡыҙы

**БЕЛОРУ́ЧКА** *м* и *ж*; *разг.* аҡһөйәк, эш һөймәүсе (һөймәҫ) кеше

**БЕЛОРЫ́БИЦА** *ж* аҡбалыҡ

**БЕЛОСНЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ап-аҡ, ҡарҙай аҡ; **белосне́жная ска́терть** ап-аҡ ашъяулыҡ

**БЕЛОТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое аҡ тәнле; **белоте́лый ребёнок** аҡ тәнле бала

**БЕЛОУ́С** *ж* аҡмыйыҡ (*үлән*)

**БЕ́ЛОЧКА** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **бе́лка**

**БЕЛОШВЕ́ЙКА** *ж* эске кейем тегеүсе (*ҡатын-ҡыҙ*)

**БЕЛОШВЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое эске кейем тегеү ...ы; **белошве́йный цех** эске кейем тегеү цехы

**БЕЛОЭМИГРА́НТ** *м* аҡ эмигрант

**БЕЛОЭМИГРА́НТСКИЙ,** -ая, -ое аҡ эмигранттар ...ы; **белоэмигра́нтское о́бщество** аҡ эмигранттар йәмғиәте

**БЕЛУ́ГА** *ж* ҡырпа (*балыҡ*) ♦ **реве́ть белу́гой** ер йыртып ҡысҡырыу, үкереп илау

**БЕЛУ́ЖИЙ,** -ья, -ье ҡырпа ...ы; **белу́жья икра́** ҡырпа ыуылдырығы

**БЕЛУ́ЖИНА** *ж* ҡырпа ите; **солёная белу́жина** тоҙло ҡырпа ите

**БЕЛУ́ХА** *ж* белуха (*поляр дельфин; олоһононң ҡорһаҡ аҫты аҡ була*)

**БЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡ; **бе́лый снег** аҡ ҡар; **бе́лая бума́га** аҡ ҡағыҙ; **бе́лые облака́** аҡ болоттар; **бе́лый хала́т** аҡ халат; **покра́сить в бе́лый цвет** аҡҡа буяу **2.** (*очень светлый*) аҡ, аҡһыл һары, етен төҫлө, аҡ тәнле; **бе́лые во́лосы** етен төҫлө сәс; **бе́лая ра́са** аҡ тәнле раса; **бе́лый хлеб** аҡ икмәк **3.** (*контрреволюционный*) аҡ; **бе́лый офице́р** аҡ офицер; **бе́лый терро́р** актар терроры; **Бе́лая а́рмия** Аҡ армия **4.** *в знач. сущ.* **бе́лые** *мн.* (*шашки, шахматные фигуры светлого цвета в отличие от чёрных*) аҡтар; **игра́ть бе́лыми** аҡтар менән уйнау **5.** (*как составная часть некоторых зоологических и ботанических названий*) аҡ; **бе́лый медве́дь** аҡ айыу; **бе́лый гриб** аҡ бәшмәк; **полеви́ца бе́лая** аҡ ҡондораҡ; **кувши́нка бе́лая** аҡ томбойоҡ; **то́поль бе́лый** аҡ тирәк; **марь бе́лая** аҡ алабута; **ака́ция бе́лая** аҡ сәрүәр; **до́нник бе́лый** аҡ ҡандала үләне ♦ **бе́лая воро́на** ала ҡарға (*башҡаларҙан берәй яғы менән айырылып торған кешегә ҡарата*); **бе́лый биле́т** аҡ билет (*сәләмәтлеге насар булыу сәбәпле, хәрби хеҙмәттән азат ителеү хаҡындағы документ*); **бе́лая горя́чка** аҡ биҙгәк (*алкоголиктарҙа була торған психик ауырыу*); **бе́лая ба́ня** аҡ мунса; **бе́лая кость** *ирон.* аҡһөйәк (*юғары ҡатлам кешеһе*); **Бе́лая олимпиа́да** Аҡ олимпиада; **бе́лое зо́лото** аҡ алтын (*мамыҡ*); **бе́лое мя́со** аҡ ит (*быҙау йәки тауыҡ, күркә ите*); **бе́лый у́голь** аҡ күмер (*һыу көсө тураһында*); **бе́лые пя́тна** аҡ таптар (*бер ҙә тикшерелмәгән йәки аҙ тикшерелгән районддар*); **бе́лые стихи́** аҡ шиғырҙар (*рифмаһыҙ шиғырҙар*); **бе́лый свет** яҡты донъя; **среди́ (средь) бе́ла дня** көпә-көндөҙ; **доводи́ть до бе́лого кале́ния** ҡанға тоҙ һалыу, ҡанды ҡыҙ-

ҙырыу, шартлар хәлгә еткереү; **принима́ть бе́лое за чёрное** аҡты ҡара тиеү, аҡты ҡара итеп күреү

**БЕЛЫ́М-БЕЛО́** *нареч.* ап-аҡ

**БЕЛЬВЕДЕ́Р** *м*; *архит.* бельведер (*тирә-яҡты күҙәтергә мөмкинлек биреп, йорт тиңенән өҫкә ҡалҡып торған ҡоролма*); **деревя́нный бельведе́р** ағас бельведер

**БЕЛЬГИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Бельгия ...ы; **бельги́йский наро́д** Бельгия халҡы

**БЕЛЬГИ́ЙЦЫ** *мн.* бельгиялылар, Бельгия халҡы // *ед.* **бельги́ец** *м* Бельгия ир-аты; **бельги́йка** *ж* Бельгия ҡатын-ҡыҙы

**БЕЛЬЁ** *с собир.* **1.** кер; **сти́рка белья́** кер йыуыу **2.** кейем; **ни́жнее бельё** эске кейем, күлдәкыштан **3.** ҡаралды; **посте́льное бельё** урын-ер ҡаралдыһы (*мендәр тышы, юрған тышы һәм түшәкябыуы*) **4.** (*столовое бельё*) аш-һыу таҫтамалдары, ашъяулыҡ, майлыҡтар ♦ **ры́ться (копа́ться) в гря́зном белье́** ғәйбәт һөйләү, ләстит һатыу

**БЕЛЬЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** урын-ер ҡаралдыһы ...ы, кер ...ы; **бельево́й шкаф** урын-ер ҡаралдыһы шкафы; **бельева́я корзи́на** кер кәрзине **2.** *в знач. сущ.* **бельева́я** *ж* урын-ер ҡаралдыһы бүлмәһе, кер бүлмәһе

**БЕЛЬМЕ́С: ни бельме́са не знать (не понима́ть, не смы́слить)** *прост.* әлепте таяҡ тип тә белмәү, бер нәмә лә белмәү (аңламау)

**БЕЛЬМО́** *с* күҙгә төшкән аҡ, ҡылау, аҡ ♦ **как бельмо́ на глазу́** күҙгә төшкән сүп (аҡ) кеүек, күҙ көйөгө (йән көйөгө) булып

**БЕЛЬЧО́НОК** *м* тейен балаһы

**БЕЛЬЭТА́Ж** *м* бельэтаж (**1.** *өйҙөң икенсе ҡаты* **2.** *театрҙа партерҙан юғары ярус*)

**БЕЛЯ́К** *м* аҡ ҡуян

**БЕЛЯШИ́** *мн.* (*ед.* **беля́ш** *м*) ваҡ бәлеш

**БЕМО́ЛЬ** *м*; *муз.* бемоль

**БЕМО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *муз.* бемоль

**БЕНГА́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое бенгал ...ы ♦ **бенга́льский ого́нь** бенгал уты (*сағыу аҡ йәки төрлө төҫ биреп балҡыған фейерверк уты*)

**БЕНГА́ЛЬЦЫ** *мн.* бенгалдар, бенгал халҡы // *ед.* **бенга́лец** *м* бенгал ир-аты; **бенга́лка** *ж* бенгал ҡатын-ҡыҙы

**БЕНЕДИКТИ́Н** *м* бенедиктин (*ликёр төрө*)

**БЕНЕФИ́С** *м* бенефис (*артистың талантын хөрмәтләү йөҙөнән уның исеменә ҡуйылған тамаша*)

**БЕНЕФИ́СНЫЙ,** -ая, -ое бенефис ...ы; **бенефи́сный спекта́кль** бенефис спектакле

**БЕНЗИ́Н** *м* бензин; **авиацио́нный бензи́н** авиация бензины

**БЕНЗИ́ННЫЙ,** -ая, -ое бензин ...ы; **бензи́нный дым** бензин төтөнө

**БЕНЗИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бензин ...ы; **бензи́новый за́пах** бензин еҫе **2.** бензин өсөн тәғәйенләнгән, бензин ...ы; **бензи́новый бак** бензин багы **3.** бензин менән эшләгән; **бензи́новый мото́р** бензин менән эшләгән мотор

**БЕНЗОБА́К** *м* бензобак

**БЕНЗОВО́З** *м* бензовоз (*бензин ташыусы автоцистерна*)

**БЕНЗОЗАПРА́ВОЧНЫЙ: бензозапра́вочная коло́нка** машинаға бензин һәм башҡа шыйыҡ яғыулыҡтар ҡоя торған колонка

**БЕНЗОЗАПРА́ВЩИК** *м* бензин ҡойғос (*самолёттарға, танкыларға һ.б. шыйыҡ яғыулыҡ ҡойоу өсөн махсус ҡулайлаштырылған автоцистерна*)

**БЕНЗОКОЛО́НКА** *ж* бензоколонка

**БЕНЗО́Л** *м* бензол (*төрлө химик буяуҙар, шартлатыу матдәләре, дарыуҙар яһауҙа ҡулланыла торған шыйыҡлыҡ*)

**БЕНЗОХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* бензин һаҡлағыс

**БЕНУА́Р** *м*; *театр.* бенуар (*ложаларҙың партер кимәлендәге ярусы*); **ло́жа бенуа́ра** бенуар ложаһы

**БЕРБЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое бербер ...ы; **бербе́рский язы́к** бербер теле

**БЕРБЕ́РЫ** *мн.* бербер халҡы, берберҙар (*Төньяҡ Африка илдәрендә йәшәгән халыҡ*) // *ед.* **бербе́р** *м* бербер ир-аты; **бербе́рка** *ж* бербер ҡатын-ҡыҙы

**БЕРГАМО́Т** *м* бергамот (**1.** *емешенең ҡабығында эфир майы күп булған цитрус ағасы* **2.** *грушаның бер сорты*)

**БЕРГАМО́ТНЫЙ** и **БЕРГАМО́ТОВЫЙ,** -ая, -ое бергамот ...ы; **бергамо́товое ма́сло** бергамот майы

**БЕРДА́НКА** *ж* берданка (*бер яһаулы боронғо хәрби мылтыҡ*)

**БЁРДО** *с* ҡылыс, тараҡ (*туҡыу станогының өлөшө*)

**БЕРДЫ́Ш** *м* айбалта (*боронғо һуғыш ҡоралы*)

**БЕ́РЕГ** *м* **1.** яр; **бе́рег реки́** йылға яры; **круто́й бе́рег** текә яр **2.** (*суша*) (һыу) буйы, яр (һыу) сите; **жить на берегу́** һыу буйында йәшәү

**БЕРЕГОВО́Й,** -ая, -ое яр ...ы, ярҙағы, яр (һыу) буйы, яр (һыу) буйындағы; **берегово́й ве́тер** һыу буйы еле; **берегова́я ли́ния** яр һыҙығы; **берегова́я артилле́рия** яр буйы артиллерияһы; **берегова́я охра́на** йылға буйы һағы

**БЕРЕДИ́ТЬ** *несов. что* **1.** ауырттырыу, ярһытыу, ҡуҙғытыу (*ауыртҡан ергә тейеп*); **береди́ть ра́ну** яраға тейеп ауырттырыу **2.** *перен.* әрнетеү, ярһытыу, ҡуҙғытыу; **не береди́ мою́ ду́шу** йөрәгемде әрнетмә, күңелемде ярһытма; **береди́ть серде́чные ра́ны** күңел яраларын ҡуҙғытыу

**БЕРЕЖЛИ́ВОСТЬ** *ж* һаҡсыллыҡ, һаҡлыҡ менән (иҫәпләп) тотоноу; **прояви́ть бережли́вость** һаҡсыллыҡ күрһәтеү

**БЕРЕЖЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаҡсыл, һаҡлыҡ менән тотоноусан; **бережли́вый челове́к** һаҡсыл кеше **2.** *см.* **бе́режный**

**БЕ́РЕЖНОСТЬ** *ж* **1.** (*осторожность*) һаҡлыҡ, һаҡсыллыҡ **2.** (*заботливость*) ҡайғыртыусанлыҡ, иғтибарлылыҡ

**БЕ́РЕЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*осторожный*) һаҡ, һаҡсыл **2.** (*заботливый*) ҡайғыртыусан, иғтибарлы

**БЕРЁЗА** *ж* ҡайын; **бе́лая берёза** аҡ ҡайын; **берёза ка́рликовая** кәрлә ҡайын; **берёза пуши́стая** тәлгәш ҡайын; **берёза призе́мистая** тәпәш ҡайын; **одино́кая берёза** яңғыҙ ҡайын

**БЕРЕЗНЯ́К** *м* ҡайынлыҡ, сауҡалыҡ, ҡайын урманы

**БЕРЁЗОВИК** *м* ҡайын бәшмәге (*ҡайынлыҡта үҫкән ашарға яраҡлы бәшмәк*)

**БЕРЁЗОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡайын ...ы; **берёзовый лист** ҡайын япрағы; **берёзовый сок** ҡайын һуты; **берёзовая ро́ща** ҡайын урманы, ҡайынлыҡ, сауҡалыҡ **2.** ҡайын ...ы, ҡайындан яһалған; **берёзовая шкату́лка** ҡайын ҡумта; **берёзовые дрова́** ҡайын утын ♦ **берёзовая ка́ша** һыйғыр сыбығ (*һуҡтырыу өсөн*)

**БЕРЕ́ЙТОР** *м* берейтор, ат өйрәтеүсе (*менге аттарҙы һыбай йөрөргә өйрәтеүсе*)

**БЕРЕ́МЕНЕТЬ** *несов.* буйға (ҡорһаҡҡа, ауырға, балаға) ҡалыу, йөккә уҙыу

**БЕРЕ́МЕННАЯ 1.** йөклө, ауырлы, ауыр аяҡлы, гөманлы **2.** *в знач. сущ.* **бере́менная** *ж* йөклө (ауырлы, ауыр аяҡлы, гөманлы) ҡатын

**БЕРЕ́МЕННОСТЬ** *ж* буйында булыу, йөклө (ауырлы, ҡорһаҡлы, гөманлы) булыу

**БЕРЕСКЛЕ́Т** *м* зелпе, осҡат

**БЕРЁСТА** и **БЕРЕСТА́** *ж* туҙ, ҡайын туҙы

**БЕРЁСТОВЫЙ** и **БЕРЕСТЯНО́Й,** -ая, -ое туҙ, ҡайын туҙынан; **берестяны́е изде́лия** ҡайын туҙынан яһалған әйберҙәр; **берестяно́е ведро́** туҙ күнәк; **берёстовый кузово́к** туҙ тырыз ♦ **берестяны́е гра́моты** туҙға яҙылған яҙмалар, яҙма ҡомартҡылар

**БЕРЕ́Т** *м* берет (*тирәсеҙ түңәрәк баш кейеме*); **кра́сный бере́т** ҡыҙыл берет; **де́тский бере́т** балалар береты; **наде́ть бере́т** берет кейеү

**БЕРЕ́ЧЬ** *несов.* **1.** *что* (*хранить*) һаҡлау, һаҡлап (ҡәҙерләп) тотоу; **берегу́ ве́щи отца́** атайымдың нәмәләрен һаҡлап тотам **2.** (*расчётливо тратить*) һаҡлау, һаҡ (иҫәп менән) тотоноу; **бере́чь се́но к весне́** бесәнде яҙға һаҡлау; **бере́чь ка́ждую копе́йку** һәр тинде иҫәпләп тотоноу **3.** *кого-что* (*заботливо оберегать*) һаҡлау; **бере́чь своё здоро́вье** һаулығыңды һаҡлау ♦ **бере́чь как зени́цу о́ка** күҙ ҡараһы кеүек һаҡлау

**БЕРЕ́ЧЬСЯ** *несов.* **1.** *кого-чего* (*остерегаться*) һаҡланыу, һаҡ (абай) булыу; **бере́чься просту́ды** һалҡын тейеүҙән һаҡланыу; **береги́сь злой соба́ки** уҫал эттән һаҡ бул **2.** *страд. от* **бере́чь**

**БЕ́РИ-БЕ́РИ** *ж нескл.*; *мед.* бери-бери ($B_1$ *витамины етешмәгәнлектән килгән ауырыу*; *авитаминоз*)

**БЕРИ́ЛЛ** *м* берилл (*затлы минерал*)

**БЕРИ́ЛЛИЙ** *м* бериллий (*химик элемент, көмөш төҫлө ҡаты еңел металл*)

**БЕ́РКОВЕЦ** *м* берковец (*ун ботҡа торошло боронғо урыҫ үлсәү берәмеге*)

**БЕ́РКУТ** *м* бөркөт; **степно́й бе́ркут** дала бөркөтө; **го́рный бе́ркут** тау бөркөтө

**БЕРЛО́ГА** *ж* өң, айыу өңө

**БЕРТОЛЕ́ТОВ: бертоле́това соль** бертолет тоҙо (*органик матдәләр менән берлектә шартлатҡыс ҡатышма барлыҡҡа килтерә торған аҡ төҫтәге кристаллик онтаҡ*)

**БЕРЦО́ВЫЙ: берцо́вые ко́сти** енсек (ашыҡ) һөйәктәре (*хайуандарҙа*); сираҡ (енсек) һөйәктәре (*кешелә*)

**БЕС...** *приставка см.* **без...**

**БЕС** *м* ен, шайтан ♦ **бес попу́тал** шайтан ҡоторттҡан; **ме́лким бе́сом рассыпа́ться** *перед кем* ҡойроҡ болғау, табан ялау, тәрилкә тотоу

**БЕСЕ́ДА** *ж* **1.** (*разговор*) әңгәмә, һөйләшеү; **вести́ оживлённую бесе́ду** ҡыҙыу әңгәмә алып барыу; **за дру́жеской бесе́дой** дуҫтарса һөйләшеп ултырғанда **2.** (*собеседование*) әңгәмә, һөйләшеү, фекер алышыу; **провести́ бесе́ду со студе́нтами** студенттар менән әңгәмә үткәреү

**БЕСЕ́ДКА** *ж* беседка (**1.** *паркта, баҡсала, өй эргәһендә ял итеп ултыра торған өҫтө ҡыйыҡлы урын* **2.** *махс. бейек биналарҙы буяғанда эшселәр өсөн яһалған аҫылмалы күтәрмә*)

**БЕСЕ́ДОВАТЬ** *несов.* әңгәмәләшеү, һөйләшеү, әңгәмә үткәреү; **бесе́довать с уча́щимися** уҡыусылар менән әңгәмә үткәреү

**БЕСЁНОК** *м*; *разг.* **1.** *уменьш. от* **бес** ен (шайтан) балаһы **2.** (*о шалуне*) шаян, шуҡ, тиктормаҫ, шайтан ботағы ♦ **бесеня́та в глаза́х** *у кого* или *чьих* күҙҙәге шаян осҡондар, күҙ уйнау

**БЕСИ́ТЬ** *несов. кого* енләндереү, асыуын ҡабартыу (килтереү), шаштырыу, ҡоторондороу

**БЕСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*заболевать бешенством — о животных*) ҡотороу **2.** (*неистовствовать*) шашыныу, ҡотороноу, енләнеү **3.** *перен.*, *прост.* (*резвиться, шалить*) пыр туҙып шаярыу, шашыныу, тилереү ♦ **с жи́ру беси́ться** *прост.* майына сыҙай алмау, һимереп (туйып) һикереү, рәхәтлеккә сыҙаша алмау

**БЕСКЛА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое синыфһыҙ, синыфтарға бүленмәгән; **бескла́ссовое о́бщество** синыфһыҙ йәмғиәт

**БЕСКОЗЫ́РКА** *ж* бескозырка; **матро́сская бескозы́рка** матрос бескозыркаһы

**БЕСКОМПРОМИ́ССНЫЙ,** -ая, -ое компромисһыҙ, килешеүһеҙ, килешеп эшләнмәгән

**БЕСКОНЕ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** сикһеҙлек, осһоҙҡырыйһыҙлыҡ, икһеҙ-сикһеҙлек; **бесконе́чность простра́нства и вре́мени** арауыҡ һәм ваҡыттың сикһеҙлеге **2.** *мат.* сикһеҙлек ♦ **до бесконе́чности** бик оҙаҡ, сикһеҙ

**БЕСКОНЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*беспредельный*) икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, сикһеҙ,

бөткөһөҙ; **вре́мя и простра́нство бесконе́чны** ваҡыт һәм арауыҡ сикһеҙ **2.** (*продолжительный, очень длинный*) бик оҙаҡ, бик оҙон, оҙайлы, бөтмәҫ-төкәнмәҫ; **бесконе́чная доро́га** бик оҙон юл; **бесконе́чные разгово́ры** бөтмәҫ-төкәнмәҫ һөйләшеүҙәр **3.** (*чрезвычайный по силе проявления*) ҙур, оло, сикһеҙ; **бесконе́чное удово́льствие** сикһеҙ ҡәнәғәтлек ♦ **бесконе́чная дробь** *мат.* сикһеҙ кәсер

**БЕСКОНТРО́ЛЬНОСТЬ** *ж* контролһеҙлек, контроль юҡлыҡ; **бесконтро́льность де́йствия** эштең контролһеҙлеге

**БЕСКОНТРО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое контролһеҙ, тикшереүһеҙ; **бесконтро́льное расхо́дование де́нег** аҡсаның контролһеҙ тотолоуы

**БЕСКОНФЛИ́КТНОСТЬ** *ж* конфликтһыҙлыҡ, низағһыҙлыҡ, дәғүәһеҙлек

**БЕСКОНФЛИ́КТНЫЙ,** -ая, -ое конфликтһыҙ, дәғүәһеҙ; **бесконфли́ктная ситуа́ция** конфликтһыҙ хәл

**БЕСКО́РМИЦА** *ж* мал аҙығына ҡытлыҡ, мал аҙығы етмәү

**БЕСКОРЫ́СТИЕ** *с* эскерһеҙлек, тынғы-һыҙлыҡ

**БЕСКОРЫ́СТНОСТЬ** *ж см.* **бескоры́стный**

**БЕСКОРЫ́СТНЫЙ,** -ая, -ое эскерһеҙ, тынғыһыҙ; **бескоры́стная по́мощь** эскерһеҙ ярҙам

**БЕСКО́СТНЫЙ,** -ая, -ое һөйәкһеҙ, ҡылсыҡһыҙ (*балыҡҡа ҡарата*)

**БЕСКРА́ЙНИЙ,** -яя, -ее и **БЕСКРА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое сикһеҙ, икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ; **бескра́йний просто́р** икһеҙ-сикһеҙ киңлек; **бескра́йнее мо́ре** сикһеҙ диңгеҙ

**БЕСКРА́ЙНОСТЬ** *ж* сикһеҙлек, икһеҙ-сикһеҙлек, осһоҙ-ҡырыйһыҙ булыу; **бескра́йность степе́й** далаларҙың икһеҙ-сикһеҙлеге

**БЕСКРИ́ЗИСНЫЙ,** -ая, -ое кризисһыҙ, тотороҡло; **бескри́зисная эконо́мика** тотороҡло иҡтисад

**БЕСКРО́ВНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** ҡанһыҙ, аҙ ҡанлы, ағарынған; **бескро́вное лицо́** ағарынған йөҙ **2.** ҡан ҡойошһоҙ; **бескро́вная побе́да** ҡан ҡойошһоҙ еңеү

**БЕСКРО́ВНЫЙ II,** -ая, -ое *уст.* (*не имеющий крова*) йорт-ерһеҙ, йәшәр урынһыҙ, төлөкһөҙ, (баш осонда) ҡыйыҡһыҙ; **бескро́вные лю́ди** йәшәр урынһыҙ кешеләр

**БЕСКРЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡанатһыҙ; **бескры́лые насеко́мые** ҡанатһыҙ бөжәктәр **2.** *перен.* төшөнкө, моңһоу, ҡанатһыҙ; **бескры́лая мечта́** ҡанатһыҙ хыял; **бескры́лая пе́сня** моңһоу йыр

**БЕСКУЛЬТУ́РЬЕ** *с*; *разг.* культураһыҙлыҡ, мәҙәниәтһеҙлек; **борьба́ с бескульту́рьем** культураһыҙлыҡ менән көрәш; **проявля́ть бескульту́рье** культураһыҙлыҡ күрһәтеү

**БЕСНОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое *уст.* енле, ен алыштырған; **бесновáтый челове́к** енле кеше

**БЕСНОВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **беси́ться** 2, 3

**БЕСО́ВКА** *ж*; *прост.*, *бран.* (*о злой, вздорной женщине*) ен ботағы, албаҫты

**БЕСО́ВСКИЙ,** -ая, -ое ен ...ы, шайтан ...ы; **бесо́вское наважде́ние** шайтан ҡотҡоһо

**БЕСПА́ЛУБНЫЙ,** -ая, -ое палубаһыҙ, палубаһы булмаған; **беспа́лубное су́дно** палубаһыҙ судно

**БЕСПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое бармаҡһыҙ, бармаҡтары өҙөлгән

**БЕСПА́МЯТНОСТЬ** *ж*; *уст.* хәтер (иҫ) юҡлыҡ, хәтерһеҙлек, онотоусанлыҡ

**БЕСПА́МЯТНЫЙ,** -ая, -ое хәтерһеҙ, иҫһеҙ, онотоусан, зиһенһеҙ; **беспа́мятный челове́к** хәтерһеҙ (онотоусан) кеше

**БЕСПА́МЯТСТВО** *с* **1.** (*обморочное состояние*) һушһыҙ (иҫһеҙ) булыу, һуштан (иҫтән) яҙыу **2.** *уст.* хәтер (иҫ) юҡлыҡ, хәтерһеҙлек, онотоусанлыҡ

**БЕСПАРДО́ННОСТЬ** *ж*; *разг.* оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, тыйнаҡһыҙлыҡ; **проявля́ть беспардо́нность** әҙәпһеҙлек күрһәтеү

**БЕСПАРДО́ННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* оятһыҙ, әҙәпһеҙ, тыйнаҡһыҙ, тартына белмәгән; **беспардо́нный челове́к** әҙәпһеҙ кеше

**БЕСПАРТИ́ЙНОСТЬ** *ж* партияһыҙ булыу, партияһыҙлыҡ, фирҡәһеҙлек

**БЕСПА́СПОРТНЫЙ,** -ая, -ое паспорты булмаған, паспортһыҙ; **беспа́спортный челове́к** паспортһыҙ кеше

**БЕСПЕРЕБО́ЙНОСТЬ** *ж* туҡтауһыҙ, тотҡарһыҙлыҡ, өҙлөкһөҙ булыу; **бесперебо́йность свя́зи** бәйләнештең өҙлөкһөҙ булыуы; **бесперебо́йность рабо́ты** эштең тотҡарһыҙлығы

**БЕСПЕРЕБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое туҡтауһыҙ, тотҡарһыҙ, өҙлөкһөҙ; **бесперебо́йная рабо́та заво́да** заводтың туҡтауһыҙ эшләүе

**БЕСПЕРЕСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое күсеп ултырмай торған, тура; **беспереса́дочный маршру́т** тура маршрут

**БЕСПЕРСПЕКТИ́ВНОСТЬ** *ж* перспектива (киләсәге) булмау, перспективаһыҙлыҡ; **бесперспекти́вность нау́чных изыска́ний** ғилми тикшеренеүҙәрҙең киләсәге булмау

**БЕСПЕРСПЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое перспективаһы булмаған, перспективаһыҙ, киләсәге өмөтһөҙ булған; **бесперспекти́вная рабо́та** перспективаһыҙ эш

**БЕСПЕЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡайғыһыҙ, борсолмаҫ, хәсрәтһеҙ; **беспеча́льное де́тство** ҡайғыһыҙ бала саҡ

**БЕСПЕ́ЧНОСТЬ** *ж* ғәмһеҙлек, моңһоҙлоҡ, вайымһыҙлыҡ, хәстәрһеҙлек, ҡайғыһыҙлыҡ; **де́тская беспе́чность** балаларға хас вайымһыҙлыҡ

**БЕСПЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ғәмһеҙ, моңһоҙ, вайымһыҙ, бошмаҫ; **беспе́чный челове́к** вайымһыҙ кеше; **беспе́чная жизнь** ғәмһеҙ тормош

**БЕСПИЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое пилотһыҙ; **беспило́тный косми́ческий кора́бль** пилотһыҙ йыһан карабы

**БЕСПИ́СЬМЕННЫЙ,** -ая, -ое яҙыуһыҙ, яҙыуы (алфавиты) булмаған; **беспи́сьменные наро́дности** яҙыуы булмаған халыҡтар; **беспи́сьменные языки́** яҙыуы булмаған телдәр

**БЕСПЛА́НОВОСТЬ** *ж* планһыҙлыҡ, план юҡлыҡ; **беспла́новость хозя́йства** хужалыҡтың планһыҙлығы

**БЕСПЛА́НОВЫЙ,** -ая, -ое планһыҙ; **беспла́новая рабо́та** планһыҙ эш

**БЕСПЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое хаҡ (аҡса) түләмәгән, түләүһеҙ, буш(ҡа); **беспла́тная медици́нская по́мощь** түләүһеҙ медицина ярҙамы; **беспла́тное обуче́ние** түләүһеҙ уҡытыу; **беспла́тное пита́ние** бушҡа ашау

**БЕСПЛАЦКА́РТНЫЙ,** -ая, -ое плацкартһыҙ; **бесплацка́ртный ваго́н** плацкартһыҙ вагон

**БЕСПЛО́ДИЕ** *с* **1.** (*неспособность производить потомство*) түлһеҙлек, биҙәүлек, түлһеҙ булыу, биҙәү булыу **2.** (*неплодородие, неплодородность — о почве*) уңдырышһыҙлыҡ, уңдырышһыҙ булыу

**БЕСПЛО́ДНОСТЬ** *ж* **1.** *см.* **беспло́дие**; **беспло́дность земли́** ерҙең уңдырышһыҙлығы **2.** (*безрезультатность*) һөҙөмтәһеҙлек, һөҙөмтәһеҙ булыу, уңышһыҙлыҡ, уңышһыҙ булыу; **беспло́дность рабо́ты** эштең һөҙөмтәһеҙ булыуы

**БЕСПЛО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неспособный производить потомство*) үрсемһеҙ, емешһеҙ (*үҫемлектәр хаҡында*); түлһеҙ, биҙәү (*ҡатындар хаҡында*); ҡыҫыр (*хайуандар хаҡында*) **2.** (*неплодородный*) уңдырышһыҙ; **беспло́дная земля́** уңдырышһыҙ ер **3.** (*бесполезный, напрасный*) файҙаһыҙ, һөҙөмтәһеҙ, буш; **беспло́дная попы́тка** һөҙөмтәһеҙ маташыу, файҙаһыҙға тырышыу; **беспло́дное ожида́ние** бушҡа көтөү

**БЕСПЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое тәнһеҙ, кәүҙәһеҙ; **беспло́тный дух** тәнһеҙ йән (*күҙгә күренмәй торған йән*)

**БЕСПОВОРО́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡырҡа, ҡәтғи, тайпылышһыҙ; **бесповоро́тное реше́ние** ҡәтғи ҡарар

**БЕСПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* сағыштырғыһыҙ, тиңдәшһеҙ, тиңе (оҡшашы) булмаған, иҫ киткес; **бесподо́бный го́лос** иҫ киткес тауыш

**БЕСПОЗВОНО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** умыртҡаһыҙ, умыртҡа һөйәкһеҙ; **беспозвоно́чные живо́тные** умыртҡаһыҙ хайуандар **2.** *в знач. сущ.* **беспозвоно́чные** *мн.*; *зоол.* умыртҡаһыҙҙар

**БЕСПОКО́ИТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*нарушать покой*) мәшәҡәтләү, борсоу, ҡамасаулау, бимазалау, маҙаһыҙлау, тынысһыҙлау; **беспоко́ить сосе́дей** күршеләрҙе бимазалау **2.** (*причинять боль*) һыҙлап (ауыртып) борсоу, тынысһыҙлау, һыҙлау, ауыртыу, маҙаға тейеү; **меня́ беспоко́ит нога́** мине аяғым тынысһыҙлай; **его́ беспоко́ит се́рдце** уның йөрәге ауырта; **у́личный шум беспоко́ит больно́го** урам шау-шыуы ауырыуҙың маҙаһына тейә **3.** (*волновать*) хәүефләндереү, борсоу, тынғы бирмәү; **меня́ беспоко́ит отсу́тствие сы́на** улымдың юҡлығы мине борсой

**БЕСПОКО́ИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*тревожиться*) борсолоу, тынысһыҙланыу, хәүефләнеү, хафаланыу; **беспоко́иться о де́тях** балалар хаҡында борсолоу **2.** (*утруждать себя*) мәшәҡәтләнеү, борсолоу, ҡайғыртыу; **не беспоко́йтесь, я сам понесу́ ве́щи** мәшәҡәтләнмәгеҙ, әйберҙәрҙе үҙем алып барырмын

**БЕСПОКО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тынғыһыҙ, мәшәҡәтле; **беспоко́йная доро́га** мәшәҡәтле юл; **беспоко́йная рабо́та** тынғыһыҙ эш **2.** тынысһыҙ; тынғы белмәгән; **беспоко́йный челове́к** тынысһыҙ кеше **3.** борсоулы; **беспоко́йный взгляд** борсоулы ҡараш **4.** тынысһыҙ; **беспоко́йное мо́ре** тынысһыҙ диңгеҙ

**БЕСПОКО́ЙСТВО** *с* **1.** борсолоу, тынысһыҙлыҡ, тулҡынланыу, хафа, тынғыһыҙлыҡ; **испы́тывать беспоко́йство** тынғыһыҙлыҡ кисереү **2.** тынысһыҙлау, мәшәҡәт, бимаза; **причиня́ть беспоко́йство** мәшәҡәт яһау (тыуҙырыу)

**БЕСПОЛЕ́ЗНОСТЬ** *ж* файҙаһыҙ булыу, файҙаһыҙлыҡ; **бесполе́зность рабо́ты** эштең файҙаһыҙ булыуы

**БЕСПОЛЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое файҙаһыҙға, бушҡа; **бесполе́зная тра́та вре́мени** бушҡа ваҡыт әрәм итеү

**БЕСПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое енесһеҙ ♦ **беспо́лое размноже́ние** *биол.* енесһеҙ үрсеү (*бүленеү юлы менән үрсеү*)

**БЕСПО́МОЩНОСТЬ** *ж* ярҙамсыһыҙ булыу, кеше көнөнә ҡалыу, кеше көнлө булыу, ярҙамға мохтажлыҡ, көсһөҙлөк; **беспо́мощность ребёнка** сабыйҙың кеше көнлө булыуы

**БЕСПО́МОЩНЫЙ,** -ая, -ое ярҙамсыһыҙ, кеше көнлө, ярҙамға мохтаж, көсһөҙ; **беспо́мощный челове́к** ярҙамға мохтаж кеше; **быть в беспо́мощном положе́нии** кеше көнлө булыу

**БЕСПОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое тоҡомһоҙ, сортһыҙ; **беспоро́дный скот** тоҡомһоҙ мал; **беспоро́дное зерно́** сортһыҙ иген

**БЕСПОРО́ЧНОСТЬ** *ж* намыҫлылыҡ, сафлыҡ, керһеҙлек; **беспоро́чность поведе́ния** тәртиптең сафлығы

**БЕСПОРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое намыҫлы, саф, керһеҙ; **беспоро́чная слу́жба** намыҫлы хеҙмәт

**БЕСПОРЯ́ДОК** *м* **1.** тәртипһеҙлек, тәртип юҡлыҡ; **в ко́мнате беспоря́док** бүлмәлә тәртипһеҙлек **2.** *мн.* **беспоря́дки** сыуалыш, бола; **студе́нческие беспоря́дки** студенттар сыуалышы

**БЕСПОРЯ́ДОЧНОСТЬ** *ж* тәртипһеҙлек, тарҡаулыҡ, буталсыҡлыҡ; **беспоря́дочность мы́слей** фекерҙәр буталсыҡлығы; **беспоря́дочность сюже́та** сюжет тарҡаулығы

**БЕСПОРЯ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәртипһеҙ, рәтһеҙ, рәте-сираты булмаған, буталсыҡ, тарҡау;

**беспоря́дочная жизнь** буталсыҡ тормош **2.** əҙмə-əҙлекһеҙ, системаһыҙ; **беспоря́дочный расска́з** системаһыҙ һөйләү **3.** (*не соблюдающий порядок, должной последовательности — о человеке*) тарҡау, тәртип белмәгән, алабарман; **беспоря́дочный челове́к** алабарман кеше

**БЕСПОСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое туҡталышһыҙ; **беспоса́дочный перелёт** туҡталышһыҙ осош

**БЕСПО́ЧВЕННОСТЬ** *ж* нигеҙһеҙлек, дәлилһеҙлек; **беспо́чвенность сужде́ния** фекерҙең дәлилһеҙлеге; **беспо́чвенность подозре́ний** шикләнеүҙәрҙең нигеҙһеҙлеге

**БЕСПО́ЧВЕННЫЙ,** -ая, -ое нигеҙһеҙ, дәлилһеҙ; **беспо́чвенное обвине́ние** нигеҙһеҙ ғәйепләү

**БЕСПО́ШЛИННЫЙ,** -ая, -ое пошлинаһыҙ; **беспо́шлинный ввоз това́ров** тауарҙарҙы пошлинаһыҙ индереү

**БЕСПОЩА́ДНО** *нареч.* аяуһыҙ, аяуһыҙлыҡ менән, рәхимһеҙ рәүештә; **беспоща́дно громи́ть врага́** дошманды аяуһыҙ ҡыйратыу

**БЕСПОЩА́ДНОСТЬ** *ж* аяуһыҙлыҡ, рәхимһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, мәрхәмәтһеҙлек, аяуһыҙ (рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ, мәрхәмәтһеҙ) булыу, ҡаты бәғерлелек; **беспоща́дность к врага́м** дошмандарға аяуһыҙлыҡ; **беспоща́дность сати́ры** сатираның рәхимһеҙ булыуы; **проявля́ть беспоща́дность** шәфҡәтһеҙлек күрһәтеү

**БЕСПОЩА́ДНЫЙ,** -ая, -ое аяуһыҙ, рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ, мәрхәмәтһеҙ, ҡаты бәғерле; **беспоща́дная война́** рәхимһеҙ һуғыш

**БЕСПРА́ВИЕ** *с* и **БЕСПРА́ВНОСТЬ** *ж* **1.** (*беззаконие*) законһыҙлыҡ **2.** (*отсутствие прав у кого-л.*) хоҡуҡһыҙлыҡ; **бесправие рабо́в** ҡолдарҙың хоҡуҡһыҙлығы

**БЕСПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое хоҡуҡһыҙ, хоҡуҡтан мәхрүм ителгән; **беспра́вные лю́ди** хоҡуҡтан мәхрүм ителгән кешеләр

**БЕСПРЕДЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* икһеҙ-сикһеҙ (осһоҙ-ҡырыйһыҙ) булыу, иркенлек, икһеҙ-сикһеҙлек, осһоҙ-ҡырыйһыҙлыҡ, сикһеҙлек, иге-сиге (осо-ҡырыйы) булмау; **беспреде́льность степе́й** далаларҙың икһеҙ-сикһеҙ булыуы

**БЕСПРЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*безграничный*) икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, иге-сиге (осо-ҡырыйы) булмаған; **беспреде́льные просто́ры** икһеҙ-сикһеҙ киңлек **2.** (*чрезмерный*) сикһеҙ, бик көслө, бик ныҡ; **беспреде́льная любо́вь к ро́дине** ватанға булған сикһеҙ мөхәббәт; **беспреде́льная уста́лость** бик ныҡ арыу

**БЕСПРЕДМЕ́ТНОСТЬ** *ж* йөкмәткеһеҙ (маҡсатһыҙ, нигеҙһеҙ) булыу, йөкмәткеһе (маҡсаты) булмау, йөкмәткеһеҙлек, маҡсатһыҙлыҡ; **беспредме́тность спо́ра** бәхәстең маҡсатһыҙлығы

**БЕСПРЕДМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое йөкмәткеһеҙ, маҡсатһыҙ, ерлекһеҙ; **беспредме́тная кри́тика** ерлекһеҙ тәнҡит; **беспредме́тный спор** маҡсатһыҙ бәхәс

**БЕСПРЕКОСЛО́ВНОСТЬ** *ж* ҡаршылыҡһыҙ (бәхәсһеҙ, ҡарыуһыҙ) булыу; **беспрекосло́вность соблюде́ния режи́ма** ҡаршылыҡһыҙ (бәхәсһеҙ) режим һаҡлау

**БЕСПРЕКОСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое ҡаршылыҡһыҙ, бәхәсһеҙ, һис шикһеҙ, һис һүҙһеҙ; **беспрекосло́вное исполне́ние** ҡаршылыҡһыҙ үтәлеш; **беспрекосло́вное подчине́ние** ҡаршылыҡһыҙ буйһоноу

**БЕСПРЕПЯ́ТСТВЕННОСТЬ** *ж* тотҡарһыҙ (тотҡарлыҡһыҙ, ҡаршылыҡһыҙ) булыу

**БЕСПРЕПЯ́ТСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое (*свободный*) тотҡарһыҙ, тотҡарлыҡһыҙ, ҡаршылыҡһыҙ, иркен; **беспрепя́тственный въезд** ҡаршылыҡһыҙ барып инеү

**БЕСПРЕРЫ́ВНОСТЬ** *ж* өҙлөкһөҙлөк, тоташ (туҡтауһыҙ) булыу, туҡталып (бүленеп) тормау; **беспреры́вность трудово́го ста́жа** хеҙмәт стажының өҙлөкһөҙлөгө

**БЕСПРЕРЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое өҙлөкһөҙ, туҡтауһыҙ, туҡталып (бүленеп) тормаған; **беспреры́вный дождь** өҙлөкһөҙ ямғыр

**БЕСПРЕСТА́ННЫЙ,** -ая, -ое (*постоянный, непрекращающийся*) бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ; **беспреста́нный плач ребёнка** баланың бер туҡтауһыҙ илауы; **беспреста́нные напа́дки** өҙлөкһөҙ бәйләнеү

**БЕСПРЕЦЕДЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое ғүмерҙә (бығаса) булмаған (күрелмәгән), оҡшашы (тиңдәше) булмаған; **беспрецеде́нтный слу́чай** ғүмерҙә булмаған хәл

**БЕСПРИ́БЫЛЬНЫЙ,** -ая, -ое файҙа (табыш) килтермәй торған, файҙаһыҙ, табышһыҙ, килемһеҙ; **беспри́быльная торго́вля** файҙаһыҙ сауҙа

**БЕСПРИДА́ННИЦА** *ж* бирнәһеҙ (игәһеҙ) ҡыҙ

**БЕСПРИЗО́РНИК** *м* и **БЕСПРИЗО́РНИЦА** *ж* ҡарауһыҙ, бағыуһыҙ бала, урам балаһы

**БЕСПРИЗО́РНОСТЬ** *ж* ҡараусыһыҙ (тәрбиәсеһеҙ) булыу, ҡарауһыҙлыҡ, бағымһыҙлыҡ; **борьба́ с де́тской беспризо́рностью** балаларҙың ҡарауһыҙлығына ҡаршы көрәш

**БЕСПРИЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лишённый присмотра, надзора*) ҡарауһыҙ, эйәһеҙ, хужаһыҙ; **беспризо́рное хозя́йство** ҡарауһыҙ хужалыҡ **2.** (*бездомный, никем не воспитываемый*) ҡараусыһыҙ, тәрбиәсеһеҙ, бағыусыһы (тәрбиәсеһе) булмаған, ҡарауһыҙ; **беспризо́рный ма́льчик** ҡарауһыҙ малай **3.** *в знач. сущ.* **беспризо́рный** *м* и **беспризо́рная** *ж* ҡараусыһыҙ, тәрбиәсеһеҙ (*бала, үҫмер*)

**БЕСПРИМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое оҡшашы (тиңе) булмаған, тиңдәшһеҙ, иҫ киткес; **бесприме́рный герои́зм** тиңе булмаған батырлыҡ

**БЕСПРИНЦИ́ПНОСТЬ** *ж* принципһыҙлыҡ, аумаҡайлыҡ, тотанаҡһыҙлыҡ; **беспринци́пность поведе́ния** тәртибендәге аумаҡайлыҡ; **бесприн-**

**ци́пность в теорети́ческих вопро́сах** теоретик мәсьәләләрҙәге принципһыҙлыҡ

**БЕСПРИНЦИ́ПНЫЙ,** -ая, -ое принципһыҙ, аумаҡай, тотанаҡһыҙ; **беспринци́пный челове́к** аумаҡай кеше; **беспринци́пное реше́ние** принципһыҙ ҡарар

**БЕСПРИСТРА́СТИЕ** *с* ғәҙел ҡараш, ғәҙел (дөрөҫ) булыу

**БЕСПРИСТРА́СТНОСТЬ** *ж см.* **беспристра́стие**

**БЕСПРИСТРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое ғәҙел, дөрөҫ; **беспристра́стный пригово́р** ғәҙел хөкөм; **беспристра́стное реше́ние** дөрөҫ ҡарар

**БЕСПРИЧИ́ННОСТЬ** *ж* сәбәпһеҙ, сәбәп (һылтау) юҡлығы, һылтауһыҙлыҡ

**БЕСПРИЧИ́ННЫЙ,** -ая, -ое сәбәпһеҙ, һылтауһыҙ, буштан-бушҡа, тиктомалға булған; **беспричи́нная грусть** сәбәпһеҙ һағыш; **беспричи́нный смех** сәбәпһеҙ көлкө

**БЕСПРИЮ́ТНОСТЬ** *ж* йорт-ерһеҙ (төлөкһөҙ, төйәкһеҙ) булыу

**БЕСПРИЮ́ТНЫЙ,** -ая, -ое йорт-ерһеҙ, төлөкһөҙ, төйәкһеҙ; **бесприю́тные лю́ди** йорт-ерһеҙ кешеләр

**БЕСПРОБУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о сне*) уянмаҫ, бик ҡаты; **беспробу́дный сон** бик ҡаты йоҡо **2.** *разг.* (*о пьянстве, пьянице*) тыйылғыһыҙ (тыйып алғыһыҙ), иҫһеҙ, айыҡмаҫ, айыҡмай торған

**БЕСПРО́ИГРЫШНЫЙ,** -ая, -ое отторошһоҙ; **беспро́игрышная лотере́я** отторошһоҙ лотерея

**БЕСПРОСВЕ́ТНОСТЬ** *ж* **1.** (*темнота*) ҡараңғылыҡ, ҡараңғы булыу **2.** *перен.* (*безрадостность*) өмөтһөҙлөк, өмөтһөҙ (шатлыҡһыҙ, ҡыуанысһыҙ, йыуанысһыҙ) булыу; **беспросве́тность одино́чества** яңғыҙлыҡтың өмөтһөҙлөгө

**БЕСПРОСВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дөм-ҡараңғы, ҡап-ҡараңғы; **беспросве́тная ночь** дөм-ҡараңғы төн **2.** *перен.* өмөтһөҙ, шатлыҡһыҙ, күңелһеҙ, ҡараңғы; **беспросве́тная жизнь** шатлыҡһыҙ тормош

**БЕСПРОСЫ́ПНЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **беспробу́дный**

**БЕСПРОЦЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое процентһыҙ; **беспроце́нтная ссу́да** процентһыҙ ссуда; **беспроце́нтный заём** процентһыҙ заём

**БЕСПУ́ТИЦА** *ж*; *прост.* юлһыҙлыҡ, юл өҙөклөгө

**БЕСПУ́ТНИК** *м* и **БЕСПУ́ТНИЦА** *ж*; *разг.* юлдан яҙған (аҙғын, боҙоҡ) кеше

**БЕСПУ́ТНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* юлдан яҙыу, аҙып-туҙып йөрөү, боҙоҡлоҡҡа бирелеү

**БЕСПУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*бестолковый*) мәғәнәһеҙ **2.** (*развратный*) юлдан яҙған, аҙғын, бәйелһеҙ, боҙоҡ; **беспу́тный челове́к** боҙоҡ кеше

**БЕСПУ́ТСТВО** *с* аҙғынлыҡ, аҙғын тормош

**БЕСПУ́ТСТВОВАТЬ** *несов.* аҙып-туҙып йөрөү, боҙоҡлоҡҡа бирелеү, бәйелһеҙләнеү

**БЕССВЯ́ЗНОСТЬ** *ж* бәйләнешһеҙлек, бәйләнеш юҡлыҡ, бәйләнешһеҙ булыу; **бессвя́зность сочине́ния** иншаның бәйләнешһеҙ булыуы

**БЕССВЯ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое бәйләнешһеҙ, өҙөк-өҙөк; **бессвя́зный расска́з** бәйләнешһеҙ хикәйә; **бессвя́зная речь** бәйләнешһеҙ телмәр

**БЕССЕМЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ғаиләһеҙ, яңғыҙ; **бессеме́йный челове́к** яңғыҙ кеше

**БЕССЕМЕРОВА́НИЕ** и **БЕССЕМЕ́РОВАНИЕ** *с*; *тех.* бессемерлау (*һауа менән ҡыуҙырып, суйындан ҡорос алыу ысулы*)

**БЕССЕМЕ́РОВСКИЙ,** -ая, -ое *тех.* бессемер ...ы; **бессеме́ровский проце́сс** бессемер процесы; **бессеме́ровская сталь** бессемер ҡоросо

**БЕССЕМЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое орлоҡһоҙ; **бессемя́нные плоды́** орлоҡһоҙ емештәр

**БЕССЕРДЕ́ЧИЕ** *с* и **БЕССЕРДЕ́ЧНОСТЬ** *ж* ҡаты бәғерлелек, ҡаты күңеллелек, шәфҡәтһеҙлек, рәхимһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ; **проявля́ть бессерде́чие** шәфҡәтһеҙлек күрһәтеү

**БЕССЕРДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡаты бәғерле, ҡаты күңелле, шәфҡәтһеҙ, рәхимһеҙ, миһырбанһыҙ; **бессерде́чный челове́к** рәхимһеҙ кеше; **бессерде́чное отноше́ние к лю́дям** кешеләргә рәхимһеҙ мөнәсәбәт

**БЕССИ́ЛИЕ** *с* **1.** көсһөҙлөк, хәлһеҙлек, кәрһеҙлек; **ста́рческое беси́лие** ҡартлыҡ көсһөҙлөгө **2.** көстән (хәлдән) килмәү, көсһөҙлөк, кеше көнлө булыу; **бесси́лие медици́ны** медицинаның көсһөҙлөгө

**БЕССИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*слабый*) көсһөҙ, хәлһеҙ, ҡарауһыҙ; **бесси́льные ру́ки** көсһөҙ ҡулдар **2.** (*беспомощный*) көсөнән (хәленән) килмәгән, кеше көнлө, көсһөҙ, дарманһыҙ, кәрһеҙ; **лю́ди бесси́льны пе́ред не́которыми боле́знями** ҡайһы бер ауырыуға ҡаршы кешеләр көсһөҙ

**БЕССИСТЕ́МНОСТЬ** *ж* системаһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек; **бессисте́мность в рабо́те** эштәге системаһыҙлыҡ

**БЕССИСТЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое системаһыҙ, тәртипһеҙ; **бессисте́мное чте́ние** системаһыҙ уҡыу

**БЕССЛА́ВИЕ** *с* хурлыҡ, яманат, данһыҙлыҡ, ҡәҙерһеҙлек; **навле́чь бессла́вие** яманат (исем) һатыу

**БЕССЛА́ВИТЬ** *несов. что* яманатын һатыу (сығарыу), абруйын төшөрөү

**БЕССЛА́ВНОСТЬ** *ж* данһыҙлыҡ, ҡәҙерһеҙлек, хурлыҡ

**БЕССЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое хурлыҡлы, данлыҡһыҙ, ҡәҙерһеҙ; **бессла́вный коне́ц** хурлыҡлы тамамланыш

**БЕССЛЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое эҙһеҙ, хәбәрһеҙ, эҙһеҙ-хәбәрһеҙ, өнһөҙ-тынһыҙ; **бессле́дное исчезнове́ние** эҙһеҙ-хәбәрһеҙ юғалыу

**БЕССЛОВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лишённый способности речи*) телһеҙ, һөйләшеүҙән

(телдән) мәхрүм; **бессловéсное живóтное** телһеҙ хайуан **2.** (*не сопровождающийся словами*) һүҙһеҙ; **бессловéсная роль** һүҙһеҙ роль **3.** (*молчаливый, безропотный*) өндәшмәç, һөйләшмәç, өнһөҙ-тынһыҙ, һүҙһеҙ, өнһөҙ; **бессловéсный человéк** өнһөҙ-тынһыҙ кеше

**БЕССМÉННОСТЬ** *ж* алмашһыҙ (сменаһыҙ) булыу; **бессмéнность рабóты** эштең сменаһыҙ булыуы

**БЕССМÉННЫЙ,** -ая, -ое алмашһыҙ, сменаһыҙ, даими; **бессмéнный председáтель** алмашһыҙ рәйес

**БЕССМÉРТИЕ** *с* **1.** (*вечное существование*) мәңгелек, мәңге йәшәү; **бессмéртие прирóды** тәбиғәттең мәңге йәшәүе **2.** *высок.* (*вечная слава*) мәңгелек дан, үлемһеҙлек; **стяжáть себé бессмéртие** үҙеңә мәңгелек дан ҡаҙаныу

**БЕССМÉРТНИК** *м* шиңмәçгөл

**БЕССМÉРТНОСТЬ** *ж* мәңгелек, үлемһеҙлек

**БЕССМÉРТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үлемһеҙ, үлмәç; **нарóд бессмéртен** халыҡ үлемһеҙ **2.** *высок.* мәңгелек, мәңге үлмәç (онотолмаç); **бессмéртный пóдвиг** мәңге онотолмаç батырлыҡ

**БЕССМЫ́СЛЕННОСТЬ** *ж* мәғәнә-һеҙлек; **бессмы́сленность постýпка** ҡылыҡтың мәғәнәһеҙлеге

**БЕССМЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лишённый смысла, содержания*) мәғәнәһеҙ, аңлайышһыҙ, буталсыҡ; **бессмы́сленный набóр слов** мәғәнәһеҙ һүҙҙәр теҙмәһе **2.** (*нелепый, бесцельный*) мәғәнәһеҙ, аҡылһыҙ, ахмаҡ; **бессмы́сленный смех** мәғәнәһеҙ көлөү; **бессмы́сленный постýпок** ахмаҡ ҡыланыш **3.** (*неразумный, ничего не понимающий*) аҡылһыҙ, аҡыл ултырмаған; **бессмы́сленный ребёнок** аҡыл ултырмаған бала

**БЕССМЫ́СЛИЕ** *с* **1.** мәғәнәһеҙ булыу, мәғәнәһеҙлек **2.** фекерһеҙ булыу, фекерһеҙлек

**БЕССМЫ́СЛИЦА** *ж*; *разг.* мәғәнәһеҙ (буш) һүҙҙәр, сафсата, мәғәнәһеҙлек, ахмаҡлыҡ; **говори́ть бессмы́слицу** сафсата һатыу

**БЕССНÉЖНЫЙ,** -ая, -ое ҡарһыҙ, ҡар ятмаған, аҙ ҡарлы; **бесснéжная зимá** ҡарһыҙ ҡыш; **бесснéжное пóле** ҡар ятмаған баçыу

**БЕССÓВЕСТНОСТЬ** *ж* намыçһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ, битһеҙлек, хаяһыҙлыҡ

**БЕССÓВЕСТНЫЙ,** -ая, -ое намыçһыҙ, оятһыҙ, битһеҙ, хаяһыҙ; **бессóвестный человéк** намыçһыҙ кеше; **бессóвестный обмáн** оятһыҙ ялған

**БЕССОДЕРЖÁТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йөкмәткеһеҙ, эстәлекһеҙ, мәғәнәһеҙ, буш; **бессодержáтельная кни́га** эстәлекһеҙ китап; **бессодержáтельный человéк** буш кеше

**БЕССОЗНÁТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*сопровождаемый потерей сознания*) иçһеҙ хәлдә, һушһыҙ; **быть в бессознáтельном состоя́нии** иçһеҙ булыу **2.** (*безотчётный, невольный*) аңһыҙ рәүештә (аңғармаçтан, ирекһеҙҙән) эшләнгән; **бессознáтельный жест** аңғармаçтан эшләнгән ишара

**БЕССÓЛНЕЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡояшһыҙ, болотло; **бессóлнечный день** ҡояшһыҙ көн

**БЕССÓННИЦА** *ж* йоҡоһоҙлоҡ, йоҡлай алмау, йоҡо ҡасыу, йоҡо алмау; **страдáть бессóнницей** йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыу

**БЕССÓННЫЙ,** -ая, -ое **1.** йоҡоһоҙ үткәргән; **бессóнные нóчи** йоҡоһоҙ үткәргән төндәр **2.** (*не спящий, бодрствующий*) йоҡламаған, уяу; **бессóнные пти́цы** уяу ҡоштар

**БЕССОЮ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* теркәүесһеҙ; **бессоюзная связь** теркәүесһеҙ бәйләнеш; **бессою́зное слóжное предложéние** теркәүесһеҙ ҡушма һөйләм

**БЕССПÓРНО 1.** *нареч.* бәхәсһеҙ, шикһеҙ, һис шикһеҙ; **казáться бесспóрно ýмной** һис шикһеҙ аҡыллы булып күренеү **2.** *в знач. вводн. сл.* әлбиттә, һис шикһеҙ; **бесспóрно, он талáнтливый поэ́т** һис шикһеҙ, ул талантлы шағир

**БЕССПÓРНОСТЬ** *ж* бәхәсһеҙ (шикһеҙ, шөбһәһеҙ) булыу; **бесспóрность доказáтельства** дәлилдең бәхәсһеҙ булыуы

**БЕССПÓРНЫЙ,** -ая, -ое бәхәсһеҙ, шикһеҙ, шөбһәһеҙ, асыҡтан-асыҡ; **бесспóрная и́стина** бәхәсһеҙ хәҡиҡәт

**БЕССРÉБРЕНИК** *м* эскерһеҙ (бер ҡатлы) кеше

**БЕССРÓЧНЫЙ,** -ая, -ое срокһыҙ, срогы сикләнмәгән, мөҙҙәтһеҙ; **бессрóчный пáспорт** срогы сикләнмәгән паспорт

**БЕССТÓЧНЫЙ,** -ая, -ое (*не имеющий стока*) аҡмаған, аҡмай торған, тымыҡ; **бесстóчное óзеро** тымыҡ күл

**БЕССТРÁСТИЕ** *с* дәртһеҙлек, һалҡынлыҡ, вайымһыҙлыҡ

**БЕССТРÁСТНЫЙ,** -ая -ое дәртһеҙ, һалҡын, бошмаç, вайымһыҙ; **бесстрáстный человéк** дәртһеҙ кеше; **бесстрáстный взгляд** һалҡын ҡараш

**БЕССТРÁШИЕ** *с* ҡурҡыуһыҙлыҡ, ҡурҡыу(ҙы) белмәү, ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, йөрәклелек

**БЕССТРÁШНЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡыуһыҙ, ҡурҡыу(ҙы) белмәгән, ҡыйыу, батыр, батыр йөрәкле; **бесстрáшный вóин** батыр һуғышсы; **бесстрáшный путешéственник** ҡыйыу сәйәхәтсе

**БЕССТРÝННЫЙ,** -ая, -ое ҡылһыҙ, ҡылы булмаған ♦ **бесстрýнная балалáйка** ярыҡ барабан (*сер тота белмәгән кешегә ҡарата*)

**БЕССТЫ́ДНИК** *м*; *разг.* оятһыҙ (әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ, инсафһыҙ, хаяһыҙ, битһеҙ) ир-ат; **бессты́дница** *ж*; *разг.* оятһыҙ (әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ, инсафһыҙ, хаяһыҙ, битһеҙ) ҡатын-ҡыҙ

**БЕССТЫ́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* оятһыҙланыу, хаяһыҙланыу

**БЕССТЫ́ДНОСТЬ** *ж* оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, тәртипһеҙлек, инсафһыҙлыҡ, хаяһыҙлыҡ, битһеҙлек

**БЕССТЫ́ДНЫЙ,** -ая, -ое оятһыҙ, әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ, инсафһыҙ, хаяһыҙ, битһеҙ; **бес-**

**сты́дный челове́к** оятһыҙ кеше; **бессты́дный посту́пок** әҙәпһеҙ ҡыланыш

**БЕССТЫ́ДСТВО** *с* оятһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, тәртипһеҙлек, инсафһыҙлыҡ, битһеҙлек

**БЕССЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* бәхетһеҙ; **бессча́стный челове́к** бәхетһеҙ кеше

**БЕССЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое һанһыҙ, иҫәпһеҙ, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ, бик күп; **бессчётное числó раз** бик күп тапҡыр

**БЕССЮЖЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое сюжетһыҙ; **бессюже́тный рома́н** сюжетһыҙ роман

**БЕСТА́КТНОСТЬ** *ж* **1.** (*отсутствие такта, чуткости*) әҙәпһеҙлек, тактһыҙлыҡ, тупһыҙлыҡ, тотанаҡһыҙлыҡ, һөмһөҙлөк; **беста́ктность поведе́ния** тәртиптә тотанаҡһыҙлыҡ **2.** (*бестактный поступок*) килешһеҙлек, урынһыҙлыҡ

**БЕСТА́КТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әҙәпһеҙ, тактһыҙ, тотанаҡһыҙ, тупһыҙ; **беста́ктный челове́к** әҙәпһеҙ кеше **2.** урынһыҙ, килешһеҙ (*һүҙ йәки ҡылған эш хаҡында*); **беста́ктный вопрóс** урынһыҙ һорау

**БЕСТАЛА́ННОСТЬ I** *ж* талантһыҙ (һәләтһеҙ, булдыҡһыҙ) булыу, талантһыҙлыҡ, һәләтһеҙлек, булдыҡһыҙлыҡ

**БЕСТАЛА́ННОСТЬ II** *ж*; *уст.* бәхетһеҙлек, бисаралыҡ, меҫкенлек

**БЕСТАЛА́ННЫЙ I,** -ая, -ое талантһыҙ, һәләтһеҙ, булдыҡһыҙ; **бестала́нный поэ́т** талантһыҙ шағир

**БЕСТАЛА́ННЫЙ II,** -ая, -ое *уст.* бәхетһеҙ, бисара, меҫкен, хәйерһеҙ; **бестала́нная голóвушка** бәхетһеҙ баш; **бестала́нный час** хәйерһеҙ сәғәт

**БЕСТАРИ́ФНЫЙ,** -ая, -ое тарифһыҙ

**БЕСТЕЛЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое есемһеҙ, кәүҙәһеҙ

**БЕСТЕНЕВО́Й,** -ая, -ое күләгәһе булмаған (төшмәгән), күләгәһеҙ; **бестенева́я ла́мпа** күләгәһеҙ лампа (*күләгә бирмәй торған махсус төҙөлөшлө электр лампаһы*)

**БЕ́СТИЯ** *ж*; *разг.* йылмаяҡ, алдаҡсы, хәйләкәр; ♦ **продувна́я бе́стия** үтә алдаҡсы кеше

**БЕСТОЛКО́ВОСТЬ** *ж* **1.** (*непонятливость, несообразительность*) маҡаулыҡ, аңралыҡ, миңрәүлек; **ста́рческая бестолкóвость** ҡарттарға хас миңрәүлек **2.** (*невразумительность, несвязность*) бәйләнешһеҙлек, аңлайышһыҙлыҡ, буталсыҡлыҡ, мәғәнәһеҙлек; **бестолкóвость перевóда** тәржемәлә буталсыҡлыҡ; **обнару́жить бестолкóвость** мәғәнәһеҙлекте асыу (табыу)

**БЕСТОЛКО́ВЩИНА** *ж*; *разг.*, *неодобр.* буталсыҡлыҡ, тәртипһеҙлек

**БЕСТОЛКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*непонятливый, несообразительный*) маҡау, миңрәү, аңра, аңыш, белекһеҙ; **бестолкóвый челове́к** белекһеҙ кеше **2.** (*невразумительный, несвязный*) бер-береһенә бәйләнмәгән, бәйләнешһеҙ, аңлайышһыҙ, мәғәнәһеҙ, буталсыҡ; **бестолкóвый перевóд** буталсыҡ тәржемә; **бестолкóвое письмó** мәғәнәһеҙ хат **3.** (*беспорядочный, совершаемый без определённой цели, без толку*) аңлайышһыҙ, рәтесираты булмаған, рәтһеҙ, тәртипһеҙ; **начала́сь бестолкóвая сумя́тица** аңлайышһыҙ ығы-зығы башланды

**БЕ́СТОЛОЧЬ** *ж*; *разг.*, *неодобр.* **1.** буталсыҡлыҡ, тәртипһеҙлек **2.** (*о бестолковом человеке*) маҡау, миңрәү, аңра (*кеше*); **быть бе́столочью** миңрәү булыу

**БЕСТРЕ́ПЕТНЫЙ,** -ая, -ое *высок.* ҡурҡыу белмәгән, ҡыйыу, батыр, ҡурҡыуһыҙ, батыр йөрәкле, айбарлы; **бестре́петный партиза́н** батыр йөрәкле партизан

**БЕСФО́РМЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** формаһыҙ; **бесфóрменная ма́сса** формаһыҙ масса **2.** буталсыҡ, тоноҡ; **бесфóрменные мечты́** буталсыҡ хыялдар

**БЕСХАРА́КТЕРНОСТЬ** *ж*; характерһыҙлыҡ; **при́знаки бесхара́ктерности** характерһыҙлыҡ билдәләре

**БЕСХАРА́КТЕРНЫЙ,** -ая, -ое характерһыҙ; **бесхара́ктерный челове́к** характерһыҙ кеше

**БЕСХВО́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡойроҡһоҙ; **бесхвóстый пету́х** ҡойроҡһоҙ әтәс

**БЕСХИ́ТРОСТНОСТЬ** *ж* хәйләһеҙлек, бер ҡатлылыҡ, эскерһеҙлек, мәкерһеҙлек; **де́тская бесхи́тростность** балаларға хас бер ҡатлылыҡ

**БЕСХИ́ТРОСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәйләһеҙ, бер ҡатлы, эскерһеҙ, мәкерһеҙ; **бесхи́тростный ребёнок** хәйләһеҙ бала **2.** (*простой, незамысловатый*) ябай, хикмәтһеҙ; **бесхи́тростный расска́з** ябай хикәйә

**БЕСХЛЕ́БИЦА** *ж*; *прост.* икмәк (иген) етешмәү, икмәк (иген) юҡлыҡ, икмәккә (игенгә) ҡытлыҡ; **послевое́нная бесхле́бица** һуғыштан һуң икмәккә ҡытлыҡ

**БЕСХО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* эйәһеҙ, хужаһыҙ; **бесхóзное иму́щество** эйәһеҙ мөлкәт

**БЕЗХОЗЯ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не имеющий собственника или неизвестно кому принадлежащий*) эйәһе (хужаһы) булмаған, эйәһеҙ, хужаһыҙ; **бесхозя́йный огорóд** хужаһыҙ баҡса **2.** (*не имеющий своего хозяйства*) үҙ хужалығы булмаған, хужалыҡһыҙ; **бесхозя́йный крестья́нин** хужалыҡһыҙ крәҫтиән

**БЕСХОЗЯ́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** хужаһыҙлыҡ; **борьба́ прóтив бесхозя́йственности** хужаһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәш **2.** тотона белмәү, бәрәшәнлек, хужаһыҙлыҡ; **бесхозя́йственность руководи́теля** етәксенең хужаһыҙлығы

**БЕСХОЗЯ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не умеющий вести хозяйство, не заботящийся о хозяйстве*) хужаһыҙлыҡ, хужалығы булмаған; хужаларса ҡарамаған; **бесхозя́йственная жена́** хужаларса ҡарамаған ҡатын **2.** (*неэкономный*) тотона (алып бара) белмәгән, бәрәшән, һаҡлыҡһыҙ; **бесхозя́йственное веде́ние дел** хужаларса эш алып бара белмәү

**БЕСХРЕБЕ́ТНОСТЬ** *ж*; *разг.* (*отсутствие твёрдости в характере, во взглядах*) йомшаҡ-

лыҡ, аумаҡайлыҡ; **бесхребе́тность не украша́ет челове́ка** йомшаҡлыҡ кешене биҙәмәй

**БЕСХРЕБЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*без хребта*) үркәсһеҙ (*тауҙар*) **2.** *перен.*, *разг.* (*беспринципный*) йомшаҡ, аумаҡай; **бесхребе́тный челове́к** аумаҡай кеше

**БЕСЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төҫһөҙ, буяуһыҙ, төҫө (буяуы) булмаған; **бесцве́тный газ** төҫһөҙ газ; **бесцве́тная жи́дкость** төҫһөҙ шыйыҡлыҡ **2.** асыҡ (сағыу, баҙыҡ) булмаған, тоноҡ, төҫһөҙ; **бесцве́тная ткань** баҙыҡ булмаған туҡыма; **бесцве́тные глаза́** төҫһөҙ күҙҙәр **3.** *перен.* (*невыразительный*) баҙыҡ булмаған, төҫһөҙ, күрмәлекһеҙ; **бесцве́тный расска́з** төҫһөҙ хикәйә

**БЕСЦЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* маҡсатһыҙ (файҙаһыҙ, буш) булыу, маҡсатһыҙлыҡ, бушлыҡ; **бесце́льность существова́ния** йәшәүҙең маҡсатһыҙ булыуы

**БЕСЦЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое маҡсатһыҙ, буш; **бесце́льное путеше́ствие** маҡсатһыҙ сәйәхәт; **бесце́льный спор** буш бәхәс

**БЕСЦЕНЗУ́РНОСТЬ** *ж* цензура тарафынан ҡаралмау, цензураһыҙлыҡ; **бесцензу́рность печа́ти** матбуғаттың цензураһыҙлығы

**БЕСЦЕНЗУ́РНЫЙ,** -ая, -ое цензуранан үтмәгән, цензураһыҙ

**БЕСЦЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неоценимый*) баһалап бөтөргөһөҙ (бик) ҡиммәтле; **бесце́нный пода́рок** баһалап бөтөргөһөҙ бүләк; **бесце́нные сокро́вища** бик ҡиммәтле хазиналар **2.** *перен.*, *уст.* (*дорогой*, *милый*) һөйөклө, ҡәҙерле; **бесце́нный друг** ҡәҙерле дуҫ **3.** *уст.* (*неценный*, *малоценный*) хаҡы булмаған, осһоҙ

**БЕСЦЕ́НОК: за бесце́нок** (бик) арзанға, юҡ хаҡҡа, (бик) осһоҙға, бушлай тиерлек; **купи́ть за бесце́нок** бик осһоҙға һатып алыу; **прода́ть за бесце́нок** бик арзанға һатыу

**БЕСЦЕРЕМО́ННОСТЬ** *ж* тупһыҙлыҡ, тыйнаҡһыҙлыҡ, һөмһөҙлөк, оятһыҙлыҡ, әрһеҙлек; **прояви́ть бесцеремо́нность** тупһыҙлыҡ күрһәтеү

**БЕСЦЕРЕМО́ННЫЙ,** -ая, -ое тупһыҙ, тыйнаҡһыҙ, тәртипһеҙ, тупаҫ, әрһеҙ, һөмһөҙ, оятһыҙ; **бесцеремо́нный челове́к** һөмһөҙ кеше; **бесцеремо́нное обраще́ние** тупаҫ мөғәмәлә

**БЕСЧЕЛОВЕ́ЧНОСТЬ** *ж* кешелекһеҙлек, рәхимһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ, аяуһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ, ҡаты бәғерлелек; **прояви́ть бесчелове́чность** кешелекһеҙлек күрһәтеү

**БЕСЧЕЛОВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое кешелекһеҙ, рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ, аяуһыҙ, ҡанһыҙ, ҡаты бәғерле; **бесчелове́чный посту́пок** рәхимһеҙ ҡылыҡ; **бесчелове́чное обраще́ние с приро́дой** тәбиғәт менән аяуһыҙ мөғәмәлә итеү

**БЕСЧЕ́СТИТЬ** *несов. кого-что* мәсхәрә (хур) итеү, яманатын һатыу, оятлы итеү, хурлыҡҡа төшөрөү; **бесче́стить свои́м посту́пком** *кого-л.* *кемделер* ҡылығың менән хур итеү

**БЕСЧЕ́СТНОСТЬ** *ж* намыҫһыҙлыҡ, выждан-һыҙлыҡ, инсафһыҙлыҡ, намыҫһыҙ (выжданһыҙ, инсафһыҙ) булыу; **показа́ть свою́ бесче́стность** үҙеңдең намыҫһыҙлығыңды күрһәтеү

**БЕСЧЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое намыҫһыҙ, выжданһыҙ, инсафһыҙ; **бесче́стный посту́пок** намыҫһыҙ ҡылыҡ

**БЕСЧЕ́СТЬЕ** *с* мәсхәрәлек, хурлыҡ, намыҫһыҙлыҡ, мәсхәрәле (хурлыҡлы, намыҫһыҙ) булыу, намыҫҡа тейеү; **нанести́ бесче́стье** *кому-л.* *кемдеңдер* намыҫына тейеү

**БЕСЧИ́ННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* әҙәпһеҙ, килешмәгән, килешһеҙ; **бесчи́нный посту́пок** әҙәпһеҙ ҡыланыш

**БЕСЧИ́НСТВО** *с* тәртип боҙоу, тәртипһеҙлек, башбаштаҡлыҡ, янъял, ғауға; **соверши́ть бесчи́нство** янъял ҡуптарыу (сығарыу)

**БЕСЧИ́НСТВОВАТЬ** *несов.* башбаштаҡланыу, тәртип боҙоу, тәртипһеҙләнеү, тәртипһеҙлек ҡылыу, янъял ҡуптарыу, ғауға сығарыу

**БЕСЧИ́СЛЕННОСТЬ** *ж* иҫәпһеҙ (иҫәпһеҙ-хисапһыҙ, һанап бөтөргөһөҙ, бик күп) булыу; **бесчи́сленность дома́шних птиц** ҡош-ҡорттоң иҫәпһеҙ күп булыуы

**БЕСЧИ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое иҫәпһеҙ, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ, иҫәп-хисабы булмаған, һанап бөтөргөһөҙ; **бесчи́сленное мно́жество** һанап бөтөргөһөҙ күп; **бесчи́сленные то́лпы** иҫәпһеҙ-хисапһыҙ төркөм; **бесчи́сленные звёзды** иҫәпһеҙ йондоҙҙар

**БЕСЧУ́ВСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** иҫ белмәү (тоймау), иҫһеҙ булыу; **бесчу́вственность те́ла** тәндең иҫ белмәүе **2.** рәхимһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, ҡаты бәғерлелек (күңеллелек); **бесчу́вственность врага́** дошмандың ҡаты бәғерлелеге **3.** (*равнодушие*) вайымһыҙлыҡ, вайымһыҙ булыу; **проявля́ть бесчу́вственность** вайымһыҙлыҡ күрһәтеү

**БЕСЧУ́ВСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҫһеҙ, иҫ белмәгән (тоймаған); **бесчу́вственный о́рган** иҫ белмәгән ағза **2.** (*бессердечный*) ҡаты күңелле (бәғерле), рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ; **бесчу́вственный челове́к** ҡаты бәғерле кеше **3.** (*равнодушный*) вайымһыҙ, иҫе китмәгән; **бесчу́вственный взгляд** вайымһыҙ ҡараш

**БЕСЧУ́ВСТВИЕ** *с* **1.** (*потеря сознания*) һушһыҙ, аңды (иҫте, һушты) юғалтыу, иҫтән (һуштан) яҙыу; **лежа́ть в бесчу́вствии** һушһыҙ ятыу **2.** (*равнодушие*) вайымһыҙлыҡ, һалҡын ҡанлылыҡ, мәғәнәһеҙлек, вайымһыҙ (бошмаҫ, һалҡын ҡанлы, тыныс күңелле) булыу; **бесчу́вствие к окружа́ющей приро́де** тирә-йүндәге тәбиғәткә (мөхиткә) вайымһыҙ булыу

**БЕСШАБА́ШНОСТЬ** *ж*; *разг.* **1.** (*беспечность*) ғәмһеҙлек, моңһоҙлоҡ, вайымһыҙлыҡ; **проявля́ть бесшаба́шность** ғәмһеҙлек күрһәтеү **2.** (*безрассудство*) саялыҡ, дыуамаллыҡ, алабарманлыҡ; **бесшаба́шность молоды́х люде́й** йәштәрҙең дыуамаллығы

**БЕСШАБА́ШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ғәмһеҙ, моңһоҙ, вайымһыҙ; **бесшаба́шный челове́к** вайымһыҙ кеше **2.** (*залихватский*) дәртле, ялҡынлы, тотанаҡһыҙ; **бесшаба́шная пе́сня** тотанаҡһыҙ йыр **3.** (*безрассудный*) сая, дыуамал; **бесшаба́шный посту́пок** дыуамал ҡылыҡ

**БЕСШО́ВНЫЙ,** -ая, -ое йөйө булмаған, йөйһөҙ; **бесшо́вная труба́** йөйһөҙ торба

**БЕСШУ́МНЫЙ,** -ая, -ое тауышһыҙ, тауыштынһыҙ, шау-шыуһыҙ; **бесшу́мный мото́р** тауышһыҙ мотор

**БЕ́ТА** *ж* бета (*грек алфавитында икенсе хәреф атамаһы*)

**БЕ́ТА-ЛУЧИ́** *мн.*; *физ.* бета-нурҙар (*радиоактив матдәләр тарҡалғанда, атом ядроһынан айырылып сыҡҡан электрондар йәки позитрондар ағымы*)

**БЕ́ТА-РАСПА́Д** *м*; *физ.* бета-тарҡалыш (*атом ядроларының радиоактив әҙерелештәре, был процеста ядролар, электрондар һәм антинейтрино йәки позитрондар һәм нейтрино айырылып сыға*)

**БЕ́ТА-ЧАСТИ́ЦЫ** *мн.* (*ед.* **бе́та-части́ца** *ж*); *физ.* бета-киҫәксәләр (*бета-тарҡалыш ваҡытында хасил булған электрондар һәм позитрондар*)

**БЕ́ТЕЛЬ** *м* бетель (*үрмәләп үҫә торған тропик үҫемлек*)

**БЕТО́Н** *м* бетон; **загото́вить бето́н** бетон әҙерләү

**БЕТОНИ́РОВАНИЕ** *с* бетонлау; **бетони́рование фунда́мента** нигеҙҙе бетонлау

**БЕТОНИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* бетонлау, бетон түшәү (йәйеү, ҡойоу); **бетони́ровать доро́гу** юл бетонлау

**БЕТОНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **бетони́ровать**

**БЕТО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** бетон ...ы; **бето́нный заво́д** бетон заводы; **бето́нная ма́сса** бетон массаһы **2.** бетон, бетондан яһалған; **бето́нный пол** бетон иҙән

**БЕТОНОМЕША́ЛКА** *ж* бетон иҙгес (болғауыс)

**БЕТО́НЩИК** *м* бетонсы, бетон ҡойоусы (түшәүсе, йәйеүсе)

**БЕФСТРО́ГАНОВ** *м* бефстроганов (*ҡаймаҡ соусында әҙерләнгән һыйыр ите*)

**БЕЧЕВА́** *ж* арҡан, ишелгән бау

**БЕЧЁВКА** *ж* бау, еп; **завяза́ть бечёвкой** еп менән бәйләү

**БЕ́ШЕНСТВО** *с* **1.** (*болезнь*) ҡотороу, ҡотороу ауырыуы, ҡотороҡ, ҡотороҡ ауырыуы; **заболе́ть бе́шенством** ҡотороҡ менән ауырыу; **приви́вка про́тив бе́шенства** ҡотороуға ҡаршы прививка **2.** *перен.* (*неистовство, ярость*) шашыу, ҡотороноу, ярһыу, шашыныу, ҡаты асыуланыу; **прийти́ в бе́шенство** ҡотороноу

**БЕ́ШЕНСТВОВАТЬ** *несов.* (*неистовствовать*) ҡотороноу, ярһыу, шашыу; **боле́льщики бе́шенствовали на стадио́не** стадионда көйәрмәндәр ярһыны

**БЕ́ШЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*больной*) ҡоторған; **бе́шеный волк** ҡоторған бүре **2.** (*неистовый*) ярһыу, үтә ҡыҙыу, ҡотороноҡ, шашҡан; **бе́шеный хара́ктер** үтә ҡыҙыу холоҡ **3.** (*яростный*) *перен.* сиктән тыш көслө (ҙур), ғәҙәттән тыш; **бе́шеная ско́рость** сиктән тыш ҙур тиҙлек ♦ **бе́шеные де́ньги** сиктән тыш күп аҡса; **бе́шеные це́ны** *разг.* сиктән тыш хаҡ

**БЕШМЕ́Т** *м* бишмәт

**БИАТЛО́Н** *м*; *спорт.* биатлон (*саңғыла ярышыуҙан һәм винтовка менән сәпкә атыуҙан торған ҡышҡы ярыш төрө*)

**БИАТЛОНИ́СТ** *м* и **БИАТЛОНИ́СТКА** *ж* биатлонсы; **соревнова́ние биатлони́стов** биатлонсылар ярышы

**БИБАБО́** *ж нескл.* бибабо (*кәмит ҡурсаҡ*)

**БИБЛЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое тәүрат ...ы; **библе́йский текст** тәүрат тексы

**БИБЛИО́ГРАФ** *м* библиограф

**БИБЛИОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** библиографик; **библиографи́ческий спра́вочник** библиографик белешмә; **библиографи́ческий указа́тель** библиографик күрһәткес **2.** библиография ...ы; **библиографи́ческий отде́л журна́ла** журналдың библиография бүлеге ♦ **библиографи́ческая ре́дкость** һирәк осрай торған китап

**БИБЛИОГРА́ФИЯ** *ж* библиография; **библиогра́фия изда́ний А.С.Пу́шкина** А.С.Пушкин баҫмаларының библиографияһы; **библиогра́фия по исто́рии башки́рской литерату́ры** башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса библиография; **соста́вить библиогра́фию** библиография төҙөү

**БИБЛИОТЕ́КА** *ж* китапхана; **де́тская библиоте́ка** балалар китапханаһы; **передвижна́я библиоте́ка** күсмә китапхана; **библиоте́ка учёного** ғалим китапханаһы

**БИБЛИОТЕ́КАРЬ** *м* и *разг.* **БИБЛИОТЕ́КАРША** *ж* китапханасы

**БИБЛИОТЕКОВЕ́ДЕНИЕ** *с* китапханасылыҡ белеме (*китапхана эшен ойоштороу тураһындағы фән*)

**БИБЛИОТЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое китапхана ...ы; **библиоте́чный катало́г** китапхана каталогы

**БИБЛИОФИ́Л** *м* библиофил, китап һөйөүсе (*һирәк осрай торған һәм ҡиммәтле китаптар йыйыуға әүәҫ кеше*)

**БИБЛИОФИ́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое библиофил ...ы

**БИБЛИОФИ́ЛЬСТВО** *с* библиофиллыҡ (*һирәк осрай торған һәм ҡиммәтле китаптар йыйыу шөғөлө*)

**БИ́БЛИЯ** *ж* Библия, Тәүрат (*йәһүд һәм христиан диненең төп китабы*)

**БИВА́К** и **БИВУА́К** *м* бивуак (*ғәскәрҙәрҙең һәм сәйәхәтселәрҙең асыҡ һауала ҡуныу йәки ял итеү өсөн туҡталған урыны*) ♦ **жить (как) на бивуа́ках** теләһә ҡайһылай йәшәү

**БИВА́ЧНЫЙ** и **БИВУА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бивуак ...ы, бивуакта; **бивуа́чные пала́тки** бивуак сатырҙары; **бивуа́чная жизнь** бивуак тормошо, бивуакта йәшәү

**БИ́ВНИ** *мн.* (*ед.* **би́вень** *м*) һуғар (һуҡҡы) тештәр; **би́вни слона́** филдең һуҡҡы тештәре

**БИГУДИ́** *мн. нескл.* бигуди; **электри́ческие бигуди́** электр бигудийы; **пластма́ссовые бигуди́** пластмасса бигуди

**БИДО́Н** *м* бидон; **алюми́ниевый бидо́н** алюмин бидон; **бидо́н для молока́** һөт бидоны

**БИЕ́НИЕ** *с см.* **би́ться**; **бие́ние се́рдца** йөрәк тибеше; **бие́ние пу́льса** пульс һуғыуы

**БИЖУТЕ́РИЯ** *ж* бижутерия (*затлы таштарҙан, металдан яһалған ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре*)

**БИ́ЗНЕС** *м* бизнес, табышлы кәсеп; **де́лать би́знес** бизнес яһау (эшләү); **занима́ться би́знесом** бизнес менән шөғөлләнеү

**БИЗНЕСМЕ́Н** *м* бизнесмен (*бизнес менән шөғөлләнгән кеше*)

**БИЗО́Н** *м* бизон (*Төньяҡ Америкала йәшәгән ҡырағай үгеҙ*)

**БИКВАДРА́ТНЫЙ: биквадра́тное уравне́ние** *мат.* биквадрат тигеҙләмәһе

**БИКФО́РДОВ: бикфо́рдов шнур** *уст.* бикфорд бауы (*шартлатҡыс матдәгә ут ебәреү өсөн тәғәйенләнгән, үҙәгенә дары тултырылған бау*)

**БИЛЕ́Т** *м*; *в разн. знач.* билет; **проездно́й биле́т** (транспортта) йөрөү өсөн алынған билет, юл билеты; **биле́т на конце́рт** концерт билеты; **лотере́йный биле́т** лотерея билеты; **вое́нный биле́т** хәрби билет; **казначе́йский биле́т** казначейство билеты; **студе́нческий биле́т** студент билеты; **экзаменацио́нный биле́т** имтихан билеты ♦ **бе́лый биле́т** *уст.* аҡ билет (*хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡты белдергән танытма*); **жёлтый биле́т** һары билет (*революцияға тиклем Рәсәйҙә фәхишәләргә бирелә торған махсус паспорт*); **зелёный биле́т** *уст.* йәшел билет (*хәрби хеҙмәттән ваҡытлыса ҡалдырылғанлыҡты белдергән танытма*); **во́лчий биле́т** *уст.* бүре билеты (*сәйәси ышанысһыҙлыҡ тураһында документ*); **пригласи́тельный биле́т** саҡырыу билеты

**БИЛЕТЁР** *м* и *разг.* **БИЛЕТЁРША** *ж* билет ҡараусы (тикшереүсе); **рабо́тать билетёром** билет тикшереүсе булып эшләү

**БИЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое билет ...ы; **биле́тная ка́сса** билет кассаһы

**БИЛИНГВИ́ЗМ** *м см.* **двуязы́чие**

**БИЛЛИО́Н** *м* биллион (*мең миллион, миллиард*)

**БИЛЛИО́ННЫЙ,** -ая, -ое биллион

**БИЛЛО́Н** *м*; *спец.* биллон (**1.** *йыйн. эшләү өсөн тотолған металл хаҡы үҙенә ҡарағанда ҡимматерәк булған ваҡ тимер аҡса* **2.** *ваҡ аҡса һуғыуға китә торған арзанлы көмөш һ.б. металдар*)

**БИЛЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое биллон

**БИЛЛЬ** *м* билль (*АҠШ-та, Бөйөк Британияла парламентта ҡарала торған закон проекты*)

**БИ́ЛО** *с* **1.** (*металлическая доска, в которую бьют для подачи различных сигналов*) саң, шаңғы; **бить в би́ло** саң ҡағыу **2.** (*ударная часть разных приспособлений и машин*) ҡаҡҡыс, һуҡҡыс; **би́ло маслобо́йки** май яҙғыстың ҡаҡҡысы; **би́ло трепа́льной маши́ны** талҡыу машинаһының һуҡҡысы

**БИЛЬЯ́РД** *м* бильярд; **игра́ть в билья́рд** бильярд уйнау

**БИЛЬЯ́РДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бильярд ...ы; **билья́рдный шар** бильярд шары; **билья́рдный кий** бильярд таяғы **2.** *в знач. сущ.* **билья́рдная** *ж* бильярд бүлмәһе, бильярдхана

**БИМЕТАЛЛИ́ЗМ** *м* биметаллизм (*ике металды, мәҫ., алтын менән көмөштө аҡса берәмегенең нигеҙе итеп йөрөтөү системаһы*)

**БИМЕТАЛЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** биметалл; **биметалли́ческий про́вод** биметалл сым (*провод*) **2.** биметаллик, биметаллизм; **биметалли́ческая систе́ма** биметаллик система

**БИМЕТА́ЛЛЫ** *мн.* (*ед.* **бимета́лл** *м*) биметалдар (*ике төрлө металл ҡатлаған йәки ретмәнән торған материал*)

**БИНО́КЛЬ** *м* бинокль; **театра́льный бино́кль** театр бинокле; **полево́й бино́кль** хәрби бинокль

**БИНОКУЛЯ́РНЫЙ: бинокуля́рное зре́ние** бинокуляр күреү (*ике күҙҙең дә берҙәй күреүе*); **бинокуля́рный микроско́п** бинокуляр микроскоп (*ике окулярлы микроскоп*)

**БИНО́М** *м*; *мат.* бином, ике быуын

**БИНТ** *м* бинт, бәйләүес; **перевяза́ть ра́ну бинто́м** яраны бинт менән бәйләү

**БИНТОВА́ТЬ** *несов. кого-что* бинтлау, бинт менән бәйләү (урау); **бинтова́ть го́лову** башты бинт менән бәйләү

**БИНТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **бинтова́ть**

**БИО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "тормошҡа ҡараған", "тормош" һәм "биология" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **биосфе́ра** биосфера; **биоста́нция** биология станцияһы

**БИОГЕОГРА́ФИЯ** *ж* биогеография (*хайуандарҙың, үҫемлектәрҙең һәм микроорганизмдарҙың донъя буйлап таралыу закондары тураһындағы фән*)

**БИО́ГРАФ** *м* биограф (*биография төҙөүсе*); **био́граф В.И.Чапа́ева** В.И.Чапаев биографы

**БИОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое биография ...ы, биографик; **биографи́ческий о́черк** биографик очерк

**БИОГРА́ФИЯ** *ж* биография (*кемдең дә булһа тормош юлын һүрәтләү*); **биогра́фия Ш.Ба́бича** Ш.Бабич биографияһы

**БИО́ЛОГ** *м* биолог, биология белгесе

**БИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое биология ...ы, биологик; **биологи́ческая ста́нция** биология станцияһы

**БИОЛО́ГИЯ** *ж* биология (*йәнле тәбиғәт тураһындағы фән*)

**БИО́НИКА** *ж* бионика (*кибернетиканың инженерлыҡ мәсьәләләрен сисеүҙә биологик процестарҙы файҙаланыуҙы өйрәнә торған бүлеге*)

**БИОПСИ́Я** *ж*; *мед.* биопсия (*сирҙең төрөн билдәләү маҡсатында микроскоп ярҙамында тикшереү өсөн ауырыу ағзанан туҡыма ҡырҡып алыу*)

**БИОСФЕ́РА** *ж* биосфера (*Ер шарында тереклек таралған өлөш*)

**БИОТО́КИ** *мн.* (*ед.* **биото́к** *м*) биотоктар (*кешенең һәм юғары төҙөлөшлө хайуандарҙың мейеһендә электромагнит тирбәлеүе*)

**БИОФИ́ЗИКА** *ж* биофизика (*тере организмда барған физик һәм физик-химик процестарҙы өйрәнә торған фән*)

**БИОХИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое биохимия ...ы, биохимик; **биохими́ческая нау́ка** биохимия ғилеме

**БИОХИ́МИЯ** *ж* биохимия (*тере материяға хас булған химик процестарҙы өйрәнә торған фән*)

**БИПЛА́Н** *м* биплан (*ҡушар ҡанатлы самолёт*)

**БИ́РЖА** *ж* биржа (*эре сауҙа һәм финанс эштәре буйынса бәйләнеш булдырыу учреждениеһы*); **фо́ндовая би́ржа** фонд биржаһы; **това́рная би́ржа** тауар биржаһы; **хле́бная би́ржа** икмәк (иген) биржаһы; **лесна́я би́ржа** урман биржаһы ♦ **би́ржа труда́** хеҙмәт биржаһы (*эш көсөн яллағанда эшсе менән йүнсел араһында бәйләнеш алып барыусы учреждение*)

**БИРЖЕВИ́К** *м* биржасы (*биржа эше менән шөғөлләнгән кеше*)

**БИРЖЕВО́Й,** -ая, -ое биржа ...ы; **биржево́й ма́клер** биржа маклеры (*аралашлыҡ итеүсе, килештереүсе*)

**БИ́РКА** *ж* бирка (*номерлы йәки яҙыулы ҡалай, таҡта*); **привя́зать к чемода́ну би́рку** сумаҙанға бирка тағыу

**БИРМА́НСКИЙ,** -ая, -ое бирман ...ы; **бирма́нский язы́к** бирман теле

**БИРМА́НЦЫ** *мн.* бирмандар, бирман халҡы // *ед.* **бирма́нец** *м* бирман ир-аты; **бирма́нка** *ж* бирман ҡатын-ҡыҙы

**БИРЮЗА́** *ж* фирүзә (*биҙәү әйбере эшләү өсөн ҡулланылған зәңгәр йәки йәшкелт төҫтәге аҫыл таш*)

**БИРЮЗО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** фирүзә, фирүзә ...ы, фирүзәнән яһалған; **пе́рстень с бирюзо́вым ка́мнем**; **бирюзо́вый пе́рстень** фирүзә ҡашлы йөҙөк **2.** (*о цвете*) фирүзә төҫлө, зәңгәр (төҫтәге), йәшел-зәңгәр; **бирюзо́вое мо́ре** зәңгәр диңгеҙ; **бирюзо́вое пла́тье** йәшел-зәңгәр күлдәк

**БИРЮ́К** *м*; *разг.* ҡырыҫ (төйтөк, томһа) кеше ♦ **смотре́ть бирюко́м** сырайын һытыу, ҡараңғы сырай күрһәтеү, бүре һымаҡ (төйтәйеп, ҡаш аҫтынан) ҡарау

**БИРЮ́ЛЬКИ: игра́ть в бирю́льки** юҡты бушҡа бушатыу, юҡ-бар нәмә менән шөғөлләнеү

**БИС** *межд.* бис (*"ҡабатла", "тағы бер ҡабат" мәғәнәһендә тамашасылар тарафынан әйтелгән һүҙ*); **крича́ть бис** бис ҡысҡырыу

**БИ́СЕР** *м собир.* сәйлән (*бик ваҡ быяла мәрйен*); **бе́лый би́сер** аҡ сәйлән; **украша́ть би́сером** сәйлән менән биҙәү ♦ **мета́ть би́сер пе́ред сви́ньями** аҡылһыҙға аҡыл һатыу

**БИ́СЕРИНА** *ж*; *разг.* сәйлән бөртөгө

**БИ́СЕРНЫЙ,** -ая, -ое сәйләндән эшләнгән, сәйлән менән биҙәлгән; **би́серный кисе́т** сәйлән менән биҙәлгән янсыҡ ♦ **би́серный по́черк** ваҡ ҡына һәм тигеҙ генә итеп яҙыу

**БИСИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* и *без доп.* бисҡа сығыу (*тамашасыларҙың һорауы буйынса ҡабатлап башҡарыу*); **курайст биси́ровал три ра́за** ҡурайсы өс тапҡыр бисҡа сыҡты

**БИСКВИ́Т** *м* бисквит (*йомортҡа, һөт-май, шәкәр ҡушып бешерелгән йомшаҡ, татлы печенье төрө*); **вани́льный бискви́т** ванилле бисквит

**БИСКВИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое бисквит; **бискви́тное пиро́жное** бисквит пирожный

**БИССЕКТРИ́СА** *ж*; *мат.* биссектриса (*мөйөштө урталай бүлеүсе тура һыҙыҡ*)

**БИТА́** *ж*; *разг.* (*при игре в бабки*) һаҡа; (*при игре в городки*) бура таяғы; (*в разных играх*) атҡы, атҡый, атабай, таяҡ

**БИ́ТВА** *ж* алыш, ҡаты (хәл иткес) һуғыш; **Кулико́вская би́тва** Куликово һуғышы; **би́тва за Москву́** Мәскәү өсөн ҡаты һуғыш

**БИТКИ́** *мн.* (*ед.* **бито́к** *м*) тапалған (туралған) ит котлеты

**БИТКО́М: битко́м наби́т** тыңҡыслап (төйгөсләп) тултырылған, туп-тулы, төйөп тултырған кеүек

**БИТУ́МНЫЙ** и **БИ́ТУМНЫЙ,** -ая, -ое битум ...ы, битум

**БИТУ́МЫ** и **БИ́ТУМЫ** *мн.* (*ед.* **биту́м** и **би́тум** *м*) битум; **нефтяны́е би́тумы** нефть битумдары

**БИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **бить 2.** *прич.* (*убитый*) һуйылған, атып алынған; **би́тая охо́тником пти́ца** һунарсы тарафынан һуйылған (атып төшөрөлгән) ҡош **3.** *прил.* ярыҡ, ватыҡ, онтаҡ; **би́тая посу́да** ватыҡ һауыт-һаба ♦ **би́тый час** бер нисә сәғәт буйы, сәғәт буйына, бик оҙаҡ, әллә күпме (*бушҡа үткәрелгән ваҡыт тураһында*)

**БИТЬ** *несов.* **1.** *кого* һуғыу, туҡмау; (*ногами*) тибеү, типкесләү; **бить кулако́м** йоҙроҡлап туҡмау; **бить нога́ми** типкесләү **2.** *кого-что, чем* һуғыу, бәреү, сапсыу; **бить цепо́м** шыбағас менән һуғыу; **конь бьёт копы́тами по земле́** ат тояҡтары менән ерҙе сапсый **3.** *во что, обо что, по чему* бәреү, ҡағыу, һуғыу; **ве́тер бьёт в лицо́** ел биткә бәрә; **волна́ бьёт о бе́рег** тулҡын ярға ҡаға; **дождь бьёт в окно́** ямғыр тәҙрәгә бәрә **4.** *во что*; *перен.* (*с особой силой действовать на ощущения, чувства и т.д. — о свете, запахе, звуке и т.д.*) бәреп (ярып) инеү, бәреп тороу; **за́пах переки́сшего те́ста бил в нос** артаған ҡамыр еҫе танауҙы ярып инде **5.** *кого-что* туҡмау, еңеү, тар-мар итеү, ҡыйратыу; **бить врага́** дошманды ҡыйратыу **6.** *кого*; *перен.* атып (һуғып) алыу, һунар итеү; **бить у́ток** өйрәктәргә һунар итеү **7.** *обычно по кому-чему* (*стрелять*) атыу, ут асыу; **бить по врагу́** дошманға ут асыу **8.** *кого-что* атыу, атып төшөрөү; **он бьёт пти́цу на лету́** ул ҡошто осоп барған еренән атып төшөрә **9.** *по кому-чему*; *перен.* (*бичевать*) фаш итеү, ҡаты тәнҡитләү, туҡмау, ҡамсылау; **бить по недоста́ткам** кәмселектәрҙе фаш итеү; **бить по бюрократи́зму** бюрократизмды ҡаты тәнҡитләү **10.** (*дробить на мелкие части, размельчать*) ваҡлау, ватыу, онтау; **бить ка́мень** таш ваҡлау **11.** (*разбивать, раскладывать*) онтау, ватыу; **бить посу́ду** һауыт-һаба ватыу **12.** (*стремительно вытекать*) бәреп тороу (сығыу), урғылып (саптырып) тороу (сығыу), атылыу; **бить фонта́ном** фонтан булып бәреп тороу; **из ра́ны бьёт кровь** яранан ҡан саптырып аға **13.** *во что* (*ударами производить звуки*) ҡағыу, һуғыу; **бить в ко́локол** саң (ҡыңғырау) ҡағыу; **бить в бараба́н** барабан ҡағыу **14.** (*в некоторых ремёслах: изготовлять, делать что-л. особым образом*) туҡыу, һуғыу, тетеү; **бить ма́сло**: 1) май туҡыу (яҙыу, бешеү, төшөрөү); 2) май һығыу; **бить шерсть** йөн тетеү; **бить моне́ту** аҡса һуғыу **15.** *без доп.* (*издавать звуки, отбивать удары*) һуғыу; **часы́ бьют по́лдень** сәғәт ун икене һуға **16.** (*трясти, вызывать дрожь*) биҙгәк тотоу; **меня́ бьёт лихора́дка** мине биҙгәк тота ♦ **бить баклу́ши** *разг.* эт һуғарыу, ел ҡыуыу, йөн тибеү; **бить в глаза́** күҙгә бәрелеп тороу, күҙгә ташланыу; **бить ка́рту** кәртте ябыу; **бить в наба́т** оран һалыу, яу һалыу; **бить трево́гу** оран һалыу; **бить в (одну́) то́чку** бер нөктәгә һуғыу (*бер йүнәлештә генә эшләү*); **бить ключо́м** ҡайнап тороу (*эш, тормош, көс-кеүәт һ.б. тураһында*); **бить по карма́ну** кеҫәгә һуғыу, зыян килтереү; **бить ми́мо це́ли** маҡсаттан ситкә китеү, маҡсатҡа ирешмәү; **бить наверняка́** уңышҡа ышанып эш итеү; **бить чело́м** баш эйеү, үтенеү, үтенеп һорау, ялбарыу

**БИТЬЁ** *с* **1.** *разг. см.* **бить** 1; **2.** *см.* **бить** 10; **битьё посу́ды** һауыт-һаба ватыу

**БИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем-чем* алышыу, һуғышыу, көрәшеү; **би́ться с враго́м** дошман менән алышыу; **би́ться на шпа́гах** шпага менән алышыу **2.** (*ударяться, колотиться обо что-л.*) һуғылыу, бәрелеү, ҡағылыу, һуғыу, бәреү; **во́лны би́лись о бе́рег** тулҡындар ярға ҡағыла ине; **би́ться голово́й об сте́ну** баш менән стенаға бәрелеү **3.** (*метаться, трепаться*) һуғылыу, үрһәләнеү, тулау; **би́ться в бреду́** һаташып үрһәләнеү **4.** *над чем, с кем-чем* и *без доп.*; *перен.* (*прилагать все усилия*) тырышлыҡ күрһәтеү, тырышыу, ыҙаланыу; **би́ться над реше́нием зада́чи** мәсьәләне сисергә тырышыу **5.** (*пульсировать*) тибеү, ҡағыу; **се́рдце бьётся** йөрәк тибә **6.** (*разбиваться — о посуде, стекле*) ватылыу, ыуалыу, онталыу; **би́ться вдре́безги** селпәрәмә килеп ватылыу **7.** *страд. от* **бить** ♦ **би́ться как ры́ба об лёд** ергә (ҡороға) ташланған балыҡ кеүек тулау (тыпырсыныу), ҡыйын хәлдән сығырға тарышыу; **би́ться об закла́д** малға (аҡсаға) бәхәсләшеү, еңешеү; **хоть голово́й об сте́ну бе́йся** башыңды ташҡа орһаң да (*цтәй алмаçлыҡ эш, ауыр хәл тураһында*)

**БИТЮ́Г** *м* ҙур кәүҙәле йөк аты

**БИФШТЕ́КС** *м* бифштекс (*ҡурылған һыйыр ите*)

**БИ́ЦЕПС** *м* бицепс (*беләк мускулы*)

**БИЧ** *м* **1.** оҙон ҡамсы, сыбыртҡы; **хло́пать бичо́м** сыбыртҡы шартлатыу **2.** *кого-чего*; *перен.* (*острое обличение чего-л.*) ут, ялҡын; **бич сати́ры** сатира уты (ялҡыны) **3.** *кого-чего*; *перен.* (*бедствие, несчастье*) бәлә, афәт; **брак — бич произво́дства** брак — производствоның бәләһе

**БИЧЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*сечь, хлестать плетью, кнутом*) һыҙырыу, ярыу, ҡамсылау, сыбыртҡылау **2.** *кого*; *перен.* фаш итеү, ҡаты тәнҡитләү, туҡмау; **бичева́ть бюрокра́тизм** бюрократизмды ҡаты тәнҡитләү

**БИЧЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **бичева́ть**

**БЛА́ГО I** *с* **1.** (*благополучие, счастье, добро*) бәхет, именлек, мәнфәғәт; **труди́ться на бла́го Ро́дины** Тыуған ил мәнфәғәте өсөн хеҙмәт итеү **2.** *обычно мн.* **бла́га** *чего* или *какие* байлыҡтар, рәхәтлектәр, муллыҡтар; **земны́е бла́га** тормош рәхәтлектәре; **материа́льные бла́га** матди байлыҡтар; **наслажда́ться бла́гами жи́зни** тормош рәхәтлектәренән кинәнеү ♦ **всех благ!** иң изге теләктәр!; **ни за каки́е бла́га!** һис тә, һис бер хәлдә лә!

**БЛА́ГО II** *союз*; *разг.* да/дә, ҙа/ҙә, ла/лә, -ғас/-гәс, -ҡас/-кәс, икән, ярай инде; **бери́, бла́го даю́т** бирәләр икән, ал

**БЛАГОВЕ́РНЫЙ** *м*; *разг.*, *шутл.* хәләл ефет, ир; **благове́рная** *ж*; *разг.*, *шутл.* хәләл ефет, йәмәғәт, бисә, ҡатын

**БЛАГОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*приятный с виду*) ҡарар күҙгә арыу ғына (матур ғына, һәйбәт кенә); **благови́дная же́нщина** ҡарар күҙгә

матур ғына ҡатын **2.** (*приличный, пристойный*) уңайлы, яйлы; **благови́дный предло́г** яйлы сәбәп, уңайлы һылтау; **оста́ться до́ма под благови́дным предло́гом** уңайлы һылтау табып өйҙә ҡалыу

**БЛАГОВОЛЕ́НИЕ** *с* мәрхәмәт, илтифат; **по́льзоваться благоволе́нием** *чьим-л. кемдеңдер* мәрхәмәтенән файҙаланыу

**БЛАГОВОЛИ́ТЬ** *несов. к кому* яҡшы мөнәсәбәттә тороу, илтифат итеү, теләктәшлек күрһәтеү

**БЛАГОВО́НИЕ** *с* **1.** *книжн.* (*приятный запах, аромат*) хуш еҫ **2.** *мн.* **благово́ния**; *уст.* хуш еҫле нәмәләр

**БЛАГОВО́ННЫЙ,** -ая, -ое хуш еҫле; **благово́нный за́пах черёмухи** муйыл сәскәһенең хуш еҫе

**БЛАГОВОСПИ́ТАННОСТЬ** *ж* әҙәплелек, тәрбиәлелек, инсафлылыҡ, әҙәпле (тәртипле, инсафлы, һапалы) булыу; **проявля́ть благовоспи́танность** әҙәплелек күрһәтеү

**БЛАГОВОСПИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, тәрбиәле, инсафлы, тәүфиҡлы; **благовоспи́танный челове́к** әҙәпле кеше; **благовоспи́танный ребёнок** тәүфиҡлы бала

**БЛАГОГОВЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* (ысын) хөрмәт менән һуғарылған, ихтирамлы, хөрмәтле, түбәнселекле

**БЛАГОГОВЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* оло ихтирам, хөрмәт, ололау

**БЛАГОГОВЕ́ТЬ** *несов. перед кем-чем*; *книжн.* (берәй кешегә) оло ихтирам күрһәтеү, баш эйеү, хөрмәт итеү; **благогове́ть пе́ред ветера́нами войны́** һуғыш ветерандарына оло ихтирам күрһәтеү

**БЛАГОДАРИ́ТЬ** *несов. кого-что* рәхмәт белдереү (әйтеү); **благодарю́ тебя́** һиңә рәхмәт; **благодари́м вас** һеҙгә рәхмәт

**БЛАГОДА́РНОСТЬ** *ж* рәхмәт, рәхмәт белдереү; **выража́ть благода́рность** рәхмәт белдереү; **получи́ть благода́рность** рәхмәт алыу; **слова́ благода́рности** рәхмәт һүҙҙәре

**БЛАГОДА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*признательный кому-л.*) рәхмәтле, яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгән; **благода́рный челове́к** яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгән кеше; **я вам о́чень благода́рен** һеҙгә рәхмәтем бик ҙур **2.** *перен.* һөҙөмтәле, уңышлы; **благода́рный труд** һөҙөмтәле хеҙмәт

**БЛАГОДА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* рәхмәт ...ы; **благода́рственное письмо́** рәхмәт хаты; **благода́рственные слова́** рәхмәт һүҙҙәре

**БЛАГОДАРЯ́ 1.** *деепр. от* **благодари́ть** **2.** *предлог с дат. п.* арҡала, арҡаһында, сәбәпле, -лыҡтан/-лектән, -ға/-гә күрә; **благодаря́ тебе́ он вы́учился** һинең арҡала ул уҡып сыҡты; **благодаря́ ва́шим забо́там** һеҙҙең ҡайғыртыуығыҙ арҡаһында ♦ **благодаря́ тому́ что** *союз* -ға/-гә күрә

**БЛАГОДА́ТНЫЙ,** -ая, -ое бай, мул, рәхәт, хозур, шифалы; **благода́тный край** бай төбәк; **благода́тный дождь** шифалы ямғыр; **благода́тная тишина́** хозур тыныслыҡ (тынлыҡ)

**БЛАГОДА́ТЬ** *ж* **1.** байлыҡ, муллыҡ, бәрәкәт; **вся э́та благода́ть на́ша** бөтә был байлыҡ беҙҙеке **2.** иркенлек, хозурлыҡ; **вот где благода́ть!** бына ҡайҙа ул хозурлыҡ! ♦ **тишь да гладь да бо́жья благода́ть** тып-тыныс тормош

**БЛАГОДЕ́НСТВИЕ** *с* именлек, хозурлыҡ, иркен, хозур тормош; **благоде́нствие страны́** илдең именлеге

**БЛАГОДЕ́НСТВОВАТЬ** *несов.* рәхәт (иркен, имен) йәшәү; **их семья́ благоде́нствовала** уларҙың ғаиләһе рәхәтлектә йәшәне

**БЛАГОДЕ́ТЕЛЬ** *м* и **БЛАГОДЕ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* яҡшылыҡ (шәфҡәт, ярҙам) итеүсе, игелек күрһәтеүсе, яҡлаусы

**БЛАГОДЕ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*благотворный*) шифалы, файҙалы; **благоде́тельное влия́ние кли́мата** климаттың шифалы тәьҫире; **благоде́тельный сове́т** файҙалы кәңәш **2.** *уст.* (*добрый*) ярҙамсыл, изгелекле, шәфҡәтле; **благоде́тельный челове́к** изгелекле кеше

**БЛАГОДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов. кому-чему*; *уст.* яҡшылыҡ (ярҙам) итеү, изгелек (миһырбанлыҡ) күрһәтеү

**БЛАГОДЕЯ́НИЕ** *с*; *высок.* яҡшылыҡ, изгелек, миһырбанлыҡ, яҡшы (изге) эш; **оказа́ть благодея́ние** изгелек күрһәтеү

**БЛАГОДУ́ШЕСТВОВАТЬ** *несов.* ғәмһеҙ (ҡайғыһыҙ, тыныс, бошмай) йәшәү

**БЛАГОДУ́ШИЕ** *с* (*добродушие*) яҡшы (киң) күңеллелек, рәхимлелек, миһырбанлыҡ, шәфҡәт; **проявля́ть благоду́шие** шәфҡәт күрһәтеү

**БЛАГОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое яҡшы (киң) күңелле, миһырбанлы, шәфҡәтле; **благоду́шный челове́к** киң күңелле кеше

**БЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬ** *м* и **БЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* яҡшылыҡ (изгелек) теләүсе

**БЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* яҡшылыҡ, изгелек, киң күңеллелек; **проявля́ть благожела́тельность** киң күңеллелек күрһәтеү

**БЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое изгелекле, киң күңелле, яҡшылыҡ теләгән; **благожела́тельный челове́к** изгелекле кеше

**БЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* яҡшылыҡ (изгелек) теләү

**БЛАГОЗВУ́ЧИЕ** *с* и **БЛАГОЗВУ́ЧНОСТЬ** *ж* аһәңлек, ҡолаҡҡа яғымлы булыу, матур яңғыраш; **благозву́чие куба́йра** ҡобайырҙың аһәңлеге

**БЛАГОЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое аһәңле, матур яңғырашлы, ҡолаҡҡа яғымлы; **благозву́чный стих** матур яңғырашлы шиғыр

**БЛАГО́Й I,** -ая -ое *уст.* (*хороший, добрый*) изге, яҡшы; **благо́е наме́рение** изге ниәт

**БЛАГО́Й II,** -ая, -ое (*сумасбродный, взбалмошный*) дыуамал, килделе-киттеле; **благо́й челове́к** дыуамал кеше ♦ **благи́м ма́том крича́ть** яр һалып ҡысҡырыу, һөрән һалыу, ер ярып ҡысҡырыу

**БЛАГОЛЕ́ПИЕ** *с*; *уст.* (*величественная красота*) мөһабәтлек, күркәмлек, матурлыҡ; **благоле́пие приро́ды** тәбиғәт матурлығы

**БЛАГОЛЕ́ПНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* мөһабәт, күркәм, матур; **благоле́пный собо́р** мөһабәт собор

**БЛАГОМЫ́СЛЯЩИЙ,** -ая, -ее *уст.* (*разумный, здравомыслящий*) аҡыллы (дөрөҫ) фекер йөрөткән; **благомы́слящий челове́к** дөрөҫ фекер йөрөткән кеше

**БЛАГОНАДЁЖНОСТЬ** *ж*; *уст.* инабатлы (ышаныслы) булыу, инабатлылыҡ, ышаныслылыҡ; **проявля́ть благонадёжность** ышаныслылыҡ күрһәтеү

**БЛАГОНАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* инабатлы, ышаныслы; **благонадёжный челове́к** инабатлы кеше

**БЛАГОНАМЕ́РЕННОСТЬ** *ж*; *уст.* изге ниәт (теләк), яҡшы (изге) уй

**БЛАГОНАМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* изге ниәтле (теләкле), яҡшы (изге) уйлы

**БЛАГОНРА́ВИЕ** *с*; *уст.* инсафлылыҡ, тәртиплелек, әҙәплелек, тәрбиәлелек; **благонра́вие ребёнка** баланың инсафлылығы

**БЛАГОНРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* инсафлы, тәртипле, әҙәпле, тәрбиәле; **благонра́вный челове́к** инсафлы кеше; **благонра́вное поведе́ние** тәртипле ҡылыҡ

**БЛАГООБРА́ЗИЕ** *с* күркәмлек, күркәм (һөйкөмлө, күркле), күркәм ҡиәфәтле; **благообра́зие челове́ка** кешенең күркәм ҡиәфәте

**БЛАГОПОЛУ́ЧИЕ** *с* **1.** (*спокойная жизнь*) именлек, тыныслыҡ; **благополу́чие семьи́** ғаилә именлеге **2.** (*обеспеченность, довольство*) байлыҡ, муллыҡ **3.** *уст.* (*счастье*) бәхет, уңышлыҡ; **жела́ть благополу́чия** бәхет теләү

**БЛАГОПОЛУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*удачный, успешный*) уңышлы; **благополу́чный исхо́д опера́ции** операцияның уңышлы тамамланыуы **2.** (*спокойный, без неприятностей*) тыныс, имен, ҡайғы-хәсрәтһеҙ; **благополу́чная жизнь** тыныс тормош

**БЛАГОПРИОБРЕТЁННЫЙ** и **БЛАГОПРИОБРЕ́ТЕННЫЙ,** -ая, -ое (*приобретённый лично, не наследственный*) үҙ көсө (тырышлығы) менән тапҡан; **благоприобретённые драгоце́нности** үҙ көсө менән тапҡан затлы нәмәләр

**БЛАГОПРИСТО́ЙНОСТЬ** *ж* әҙәплелек, әхлаҡлылыҡ, инсафлылыҡ, тәртиплелек, тәрбиәлелек, бәҫлек; **соблюда́ть благопристо́йность** әҙәплелек һаҡлау

**БЛАГОПРИСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, әхлаҡлы, инсафлы, тәртипле, тәрбиәле; **благопристо́йное поведе́ние** әҙәпле ҡылыҡ

**БЛАГОПРИЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*способствующий чему-л., удобный для чего-л.*) уңайлы, яйлы, ҡулайлы; **благоприя́тные усло́вия** уңайлы шарттар; **благоприя́тный слу́чай** яйлы осраҡ **2.** (*хороший, одобрительный*) яҡшы тип табылған, хуп күрелгән, ыңғай; **благоприя́тный о́тзыв о по́вести** повесть хаҡында ыңғай баһа

**БЛАГОПРИЯ́ТСТВОВАТЬ** *несов. кому-чему* яйы (уңайы) килеп тороу, уңайлы (яйлы) булыу, булышлыҡ (ярҙам) итеү; **пого́да благоприя́тствовала убо́рке урожа́я** һауа шарттары уңыш йыйыу өсөн яйлы булды

**БЛАГОРАЗУ́МИЕ** *с* уйлап (аҡыл менән) эш итеү, аҡыл, аҡыллылыҡ; **потеря́ть благоразу́мие** аҡылһыҙланыу, аҡылды юғалтыу

**БЛАГОРАЗУ́МНОСТЬ** *ж см.* **благоразу́мие**

**БЛАГОРАЗУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аҡыллы, төплө, ныҡлы, уйлап (аҡыл менән) эш итеүсән; **благоразу́мный челове́к** төплө кеше; **благоразу́мный сове́т** аҡыллы кәңәш

**БЛАГОРО́ДИЕ: ва́ше (его́, их) благоро́дие** ғали йәнәптәре, бөйөк әфәнде (*революцияға тиклемге Рәсәйҙә юғары ҡатлам кешеләрен, дәрәжәһенә ҡарап, айырып өндәшеү һүҙе*)

**БЛАГОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** оло йөрәкле, юғары намыҫлы, выжданлы; **благоро́дный челове́к** юғары намыҫлы кеше **2.** (*возвышенный*) бөйөк, юғары, изге; **благоро́дное де́ло** изге эш; **благоро́дная цель** бөйөк маҡсат **3.** (*обладающий изяществом*) күркәм, гүзәл, матур, нәзәкәтле; **благоро́дная красота́** гүзәл матурлыҡ **4.** *уст.* (*дворянского происхождения*) затлы, затлы нәҫел, аҫыл һөйәк; ♦ **благоро́дные мета́ллы** аҫыл металдар (*алтын, көмөш, платина*)

**БЛАГОРО́ДСТВО** *с* **1.** (*величие, возвышенность*) юғары намыҫлылыҡ, юғары выжданлылыҡ; **благоро́дство души́** күңелдең юғары выжданлылығы **2.** (*высокое достоинство, изящество, красота*) дәрәжәлелек, нәзәкәтлек, бәҫлек, гүзәллек, күркәмлек, матурлыҡ; **благоро́дство сти́ля** стиль матурлығы; **благоро́дство оса́нки** буй-һын нәзәкәтлеге

**БЛАГОСКЛО́ННОСТЬ** *ж* күңел ятышы, илтифатлыҡ, яҡшы мөнәсәбәт; **проявля́ть благоскло́нность** яҡшы мөнәсәбәт күрһәтеү, яҡшы мөнәсәбәттә булыу

**БЛАГОСКЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое яҡшы (изге) теләкле, илтифатлы, яҡшы мөнәсәбәттә булған, күңелгә ятышлы (ятҡан); **благоскло́нный челове́к** изге теләкле кеше; **благоскло́нное отноше́ние** илтифатлы мөнәсәбәт

**БЛАГОСЛОВЕ́НИЕ** *с* **1.** *уст.* фатиха, доға; **получи́ть благослове́ние** фатиха алыу **2.** *разг., шутл.* (*одобрение*) ризалыҡ биреү, хуплау, яҡшы теләк

**БЛАГОСЛОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* фатиха (ризалыҡ, доға) алған; **благослове́нный день** фатиха алған көн **2.** *высок.* бәхетле, имен; **благослове́нная страна́** бәхетле ил

**БЛАГОСЛОВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*перекрестить*) фатиха биреү, доға ҡылыу; **благослови́ть дете́й** балаларға фатиха биреү **2.** (*одобрить*) ризалыҡ биреү, хуплау; **благослови́ть мне́ние** *кого-л. кемдеңдер* фекерен хуплау **3.** (*возблагодарить*) шөкөр итеү, рәхмәт уҡыу; **благослови́ть судьбу́** яҙмышҡа шөкөр итеү

**БЛАГОСОСТОЯ́НИЕ** *с* иркен (мул) тормош, байлыҡ, муллыҡ, етешлек; **ли́чное благосостоя́ние** шәхси байлыҡ

**БЛА́ГОСТНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* шифалы, бәхет (байлыҡ, ҡот) килтергән, күңелле, рәхәт; **бла́гостный дождь** шифалы ямғыр; **бла́гостные дни** күңелле көндәр

**БЛАГОТВОРИ́ТЕЛЬ** *м* и **БЛАГОТВОРИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* шәфҡәт (изгелек, игелек, яҡшылыҡ, ярҙам) күрһәтеүсе, ярҙам итеүсе

**БЛАГОТВОРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* шәфҡәт (изгелек, яҡшылыҡ, ярҙам) күрһәтеү, шәфҡәтлелек, изгелек итеү

**БЛАГОТВОРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шәфҡәтлек (изгелек, яҡшылыҡ, ярҙам) ...ы, хәйриә; **благотвори́тельный конце́рт** шәфҡәтлек концерты; **благотвори́тельное о́бщество** хәйриә йәмғиәте

**БЛАГОТВОРИ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* шәфҡәт (изгелек, яҡшылыҡ, ярҙам) күрһәтеү, хәйер биреү

**БЛАГОТВОРИ́ТЬ** *несов.*; *книжн.*, *уст.* шәфҡәтлек күрһәтеү

**БЛАГОТВО́РНОСТЬ** *ж* яҡшы (шифалы, файҙалы) булыу; **благотво́рность лече́ния** дауаланыуҙың шифалы булыуы

**БЛАГОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое яҡшы, шифалы, файҙалы; **благотво́рный кли́мат** шифалы климат

**БЛАГОУСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **благоустро́ить**

**БЛАГОУСТРО́ЕННОСТЬ** *ж* уңайлы (яйлы, төҙөк, етеш) булыу, төҙөклөк, етешлек; **благоустро́енность села́** ауылдың төҙөклөгө

**БЛАГОУСТРО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое уңайлы, яйлы, төҙөк, етеш, уңайлы яҡтары (шарттары) булған; **благоустро́енная кварти́ра** уңайлы шарттары булған фатир

**БЛАГОУСТРО́ИТЬ** *сов. что* төҙөкләндереү, яйға һалыу; **благоустро́ить у́лицу** урамды төҙөкләндереү

**БЛАГОУСТРО́ЙСТВО** *с* төҙөкләндереү, яйға (тәртипкә) килтереү, етештереү; **благоустро́йство де́тских площа́док** балалар майҙансыҡтарын төҙөкләндереү

**БЛАГОУХА́НИЕ** *с* хуш еҫ; **благоуха́ние цвето́в** сәскәләрҙең хуш еҫе

**БЛАГОУХА́ННЫЙ,** -ая, -ое хуш еҫле; **благоуха́нные цветы́** хуш еҫле сәскәләр

**БЛАГОУХА́ТЬ** *несов.* хуш еҫ аңҡытыу (бөркөү), хуш еҫ сығарыу (таратыу); **ро́зы благоуха́ют** розалар хуш еҫ аңҡыта

**БЛАГОЧЕСТИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *уст.* диндар, дин тотҡан, тәҡүә; **благочести́вый челове́к** диндар кеше

**БЛАГОЧЕ́СТИЕ** *с*; *уст.* диндарлыҡ, дин тотоу, динле булыу, тәҡүәлек

**БЛАЖЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*счастливый, благополучный*) бәхетле, шат(лыҡлы), хозур; **блаже́нная улы́бка** шат йылмайыу **2.** *в знач. сущ.* **блаже́нный** *м* и **блаже́нная** *ж*; *рел.* (*юродивый*) дәрүиш, байғош **3.** *разг.* (*чудной*) аҡылға һай, йүләр, диуана

**БЛАЖЕ́НСТВО** *с* **1.** оло (ҙур) бәхет **2.** хозурлыҡ, рәхәтлек, ләззәт ♦ **на верху́ блаже́нства** рәхәтлектең сигенә сығыу, хозурлыҡ кисереү

**БЛАЖЕ́НСТВОВАТЬ** *несов.* рәхәтләнеү, ләззәтләнеү, хозурланыу

**БЛАЖИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* алйотланыу, ҡоторою, йүләрләнеү, тилереү; **переста́нь блажи́ть!** алйотланма!

**БЛАЖНО́Й,** -ая, -ое *прост.* алйот, йүләр, дыуамал, тинтәк, диуана, килделе-киттеле; **блажно́й челове́к** тинтәк кеше

**БЛАЖЬ** *ж*; *разг.* дыуамаллыҡ, тинтәклек, диуаналыҡ, алйотлоҡ, йүләрлек; **вы́кинь блажь из головы́!** башыңдан сығарып ташла шул дыуамаллыҡты!

**БЛАНК** *м* бланк; **телегра́фный бланк** телеграф бланкыһы; **заполня́ть бланк** бланк(ыны) тултырыу

**БЛА́НКОВЫЙ,** -ая, -ое бланк ...ы; **бла́нковый листо́к** бланк ҡағыҙы

**БЛАНМАНЖЕ́** *с нескл.*; *кул.* бланманже (*ҡаймаҡтан йәки миндаль һөтөнән яһалған желе*)

**БЛАНШИРОВА́ТЬ** *несов. что*; *кул.* бешекләү, бешекләп алыу; **бланширова́ть грибы́** бәшмәктәрҙе бешекләп алыу; **бланширова́ть помидо́ры** помидорҙарҙы бешекләп алыу

**БЛАТ** *м* **1.** йәшерен (шартлы) тел **2.** *прост.* танышлыҡ, белешлек, таныш-тоношлоҡ, эшнәлек; **получи́ть по бла́ту** таныш-тоношлоҡ менән алыу

**БЛЕДНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** төҫ китеү (ҡасыу), төҫһөҙ булыу, ҡобараһы осоу, ҡомһарыу, ағарыу, ағарыныу; **бледне́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан ағарыныу; **не́бо бледне́ет** күк йөҙө ағара **2.** *перен.* тоноҡланыу, көсөн (әһәмиәтен) кәметеү, төҫһөҙләнеү

**БЛЕДНОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ее ағарынған йөҙлө, төҫө ҡасҡан, көл төҫлө, нурһыҙ йөҙлө; **бледноли́цый ребёнок** нурһыҙ йөҙлө бала

**БЛЕ́ДНОСТЬ** *ж* **1.** төҫө ҡасҡан (киткән) булыу, көлһыу төҫ, йөҙөндә нуры булмау,

ағарынғанлыҡ, нурһыҙлыҡ; **бле́дность лица́** төҫ ҡасҡанлыҡ **2.** асыҡ (сағыу) булмау, тоноҡлоҡ; **бле́дность кра́сок** буяуҙар тоноҡлоғо **3.** *перен.* баҙыҡһыҙлыҡ, көсһөҙ (тасуирһыҙ, ярлы) булыу; **бле́дность изложе́ния** хикәйәләүҙең тасуирһыҙ булыуы

**БЛЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төҫө ҡасҡан (киткән), ағарынған, нурһыҙ, көлһыу; **бле́дное лицо́** нурһыҙ йөҙ **2.** тоноҡ, төҫһөҙ; **бле́дный узо́р** төҫһөҙ биҙәк; **бле́дная луна́** тоноҡ ай; **бле́дный цвет** тоноҡ төҫ **3.** *перен.* (*невыразительный, лишённый яркости — о языке, стиле и т.д.*) көсһөҙ, баҙыҡ булмаған, төҫһөҙ; **бле́дный расска́з** төҫһөҙ хикәйә

**БЛЁКЛОСТЬ** *ж* төҫ уңған булыу, тоноҡлоҡ, һулығанлыҡ; **блёклость кра́сок** буяуҙар(ҙың) тоноҡлоғо; **блёклость цвето́в** төҫтәрҙең уңған булыуы

**БЛЁКЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** шиңгән, һулыған; **блёклая трава́** һулыған үлән; **блёклые цветы́** шиңгән сәскәләр **2.** (*лишённый яркости окраски*) төҫөн юғалтҡан, тоноҡ, уңған; **блёклый тон** тоноҡ төҫ; **блёклые кра́ски** төҫөн юғалтҡан буяуҙар

**БЛЁКНУТЬ** *несов.* **1.** шиңеү, һулыу, ҡороу; **цветы́ блёкнут** сәскәләр шиңә(ләр) **2.** төҫөн юғалтыу, тоноҡланыу, уңыу; **пе́ред рассве́том звёзды блёкнут** таң алдынан йондоҙҙар тоноҡлана(лар)

**БЛЕСК** *м* **1.** ялтырауыҡ, ялтырау, ялтыр; **блеск со́лнца** ҡояш ялтырауы; **блеск мо́лнии** йәшен ялтырауы; **блеск самова́ра потускне́л** самауырҙың ялтыры бөткән; **придава́ть блеск** ялтыр итеү, ялтыратыу **2.** *перен.* (*пышность, великолепие*) ҡупшылыҡ, күркәмлек, гүзәллек; **блеск наря́да** кейемдең ҡупшылығы **3.** *чего; перен.* (*яркое проявление каких-л. достоинств, способностей*) сағылыш; **блеск тала́нта** талант(тың) сағылышы; **блеск ума́** аҡыл(дың) сағылышы ♦ **во всём бле́ске** матурлығы (күркәмлеге) менән балҡып торған; **с бле́ском** иҫ киткес шәп, ғәжәп яҡшы

**БЛЕСНА́** *ж* ялтырауыҡ, ялтамбый, алдатҡыс, йылтырма (*ҡармаҡ төбөнә ҡуйылған алдатҡыс йылтыр ҡалай*); **у́дочка с блесно́й** йылтырмалы ҡармаҡ

**БЛЕСНИ́ТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *рыб.* йылтырмаға ҡаптырыу (*балыҡты*)

**БЛЕСНУ́ТЬ** *сов.* **1.** йылтырап (йылтлап) китеү, йылт итеп ҡуйыу (ҡалыу), ялтлау; **блесну́ла мо́лния** йәшен ялтланы **2.** *перен.* келт итеп иҫкә төшөү, ҡапыл башҡа килеү (төшөү), ҡабыныу, сағылып китеү; **у меня́ блесну́ла мысль** башыма ҡапыл бер уй килде; **блесну́ла наде́жда** ҡапыл өмөт ҡабынды

**БЛЕСТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *чем* и *без доп.* йылтырау, ялтырау, йылҡ-йылҡ итеү, йылҡылдау, йылмылдау, ялт (ялт-йолт) итеү, йым-йым итеү, йымылдау йылтылдау; **на не́бе бле́щут звёзды** күктә йондоҙҙар йым-йым итә; **роса́ блести́т на со́лнце** ҡояшта ысыҡ ялтырай **2.** йылтырау, ялтырау; **во́лосы блестя́т** сәсе йылтырап тора **3.** мызлау, йызлау, ялтырау, йылтырау; **у него́ глаза́ блестя́т** уның күҙҙәре мызлап тора **4.** *чем; перен.* айырылып тороу (*берәй сифаты менән*), иҫ китереү, таң ҡалдырыу; **он бле́щет тала́нтом** ул һәләте менән айырылып тора; **она́ бле́щет красото́й** ул матурлығы менән таң ҡалдыра

**БЛЁСТКИ** *мн.* (*ед.* **блёстка** *ж*) **1.** (*украшение*) елбәҙәк, йылтыр-йышыр, йылтылдаҡ; **вы́шитое блёстками пла́тье** елбәҙәк менән (елбәҙәкләп) сигелгән күлдәк **2.** *чего; перен.* (*отдельные яркие проявления каких-л. способностей, дарований*) сатҡылар, осҡондар; **блёстки тала́нта** һәләтлек сатҡылары; **блёстки поэ́зии** шиғриәт сатҡылары

**БЛЕСТЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **блесте́ть** **2.** *прил.* (*яркий, сверкающий*) ялтырап (йылтырап, мызлап) торған, ем-ем итеп (емелдәп) торған; **блестя́щие звёзды** емелдәп торған йондоҙҙар; **блестя́щие глаза́** мызлап торған күҙҙәр **3.** *прил.* (*великолепный, роскошный*) ҡупшы, күркәм, гүзәл, бик матур; **блестя́щий ве́чер** (бик) матур кисә; **блестя́щий наря́д** бик ҡупшы кейем **4.** *прил.; перен.* (*замечательный, превосходный*) бик яҡшы (шәп, һәйбәт), иҫ киткес, һоҡландырғыс, быуа тигән; **получи́ть блестя́щее образова́ние** бик яҡшы белем алыу; **блестя́щий арти́ст** быуа тигән артист; **блестя́щие успе́хи** бик шәп уңыштар

**БЛЕФ** *м* уйҙырма, буш ҡыуыҡ

**БЛЕ́ЯНИЕ** *с см.* **бле́ять**

**БЛЕ́ЯТЬ** *несов.* мәәлдәү, бәәлдәү, баҡырыу (*һарыҡ, кәзә тураһында*)

**БЛИЖА́ЙШИЙ,** -ая, -ее **1.** *превосх. ст. от* **бли́зкий** иң яҡын, иң яҡындағы; **ближа́йшее почто́вое отделе́ние** иң яҡындағы почта бүлексәһе **2.** (*первоочередной*) беренсе сираттағы, яҡындағы; **ближа́йшая зада́ча** беренсе сираттағы бурыс **3.** (*непосредственный, прямой*) туранан-тура, туп-тура, төп, яҡындан; **при ближа́йшем его́ уча́стии** уның туранан-тура ҡатнашлығы менән

**БЛИ́ЖНИЙ,** -яя, -ее **1.** яҡын, яҡындағы, яҡын ятҡан; **бли́жние сёла** яҡындағы ауылдар **2.** (*кратчайший, недальний*) тура, урау булмаған, ҡыҫҡа; **е́хать бли́жней доро́гой** тура юл менән барыу **3.** *уст.* (*находящийся в кровном родстве*) ҡан-ҡәрҙәш, (бик) яҡын; **бли́жний ро́дственник** яҡын туған **4.** *в знач. сущ.* **бли́жний** *м* (*о человеке*) яҡын кеше; **забо́титься о бли́жнем** яҡын кеше(ң) тураһында хәстәрлек күреү

**БЛИЗ** *предлог с род. п.* эргәһендә, янында, яҡынында; **близ до́ма** өй эргәһендә; **близ го́рода** ҡала янында

**БЛИ́ЗИТЬСЯ** *несов.* яҡынайыу, яҡынлашыу, яҡынлау; **бли́зится ту́ча** болот яҡынлай; **ле́то бли́зится** йәй яҡынлаша

**БЛИ́ЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*недалёкий*) яҡын, яҡындағы; **бли́зкое расстоя́ние** яҡын ара; **бли́зкий лес** яҡындағы урман **2.** (*короткий*); *разг.* оҙон түгел, ҡыҫҡа; **бли́зкая доро́га** ҡыҫҡа юл **3.** (*о времени*) яҡын, яҡында буласаҡ; **бли́зкое бу́дущее** яҡын киләсәк **4.** (*о родстве*) яҡын; **бли́зкий ро́дственник** яҡын туған, бауырҙаш **5.** *в знач. сущ.* **бли́зкие** *мн.* туғандар, яҡындар, ҡәрҙәштәр **6.** (*об отношениях* дуҫлыҡ, әшнәлек мөнәсәбәтендә булған, яҡын дуҫ, әшнә (кеше); **бли́зкий друг** яҡын дуҫ; **бли́зкий челове́к** дуҫ кеше; **бли́зкая подру́га** яҡын әхирәт **7.** *в чём, чему, по чему, к чему* и *без доп.* (*сходный, похожий*) яҡын, оҡшаш; **бли́зкий к оригина́лу перево́д** оригиналға яҡын тәржемә

**БЛИ́ЗКО 1.** *нареч.* яҡындан; **бли́зко познако́миться** яҡындан танышыу **2.** *нареч.* яҡын; **бли́зко подойти́** яҡын барыу **3.** *в знач. сказ.* яҡын; **бли́зко до го́рода** ҡалаға яҡын; **ночь бли́зко** төн яҡын

**БЛИЗЛЕЖА́ЩИЙ,** -ая, -ее яҡындағы, йәнәштәге, яҡын-тирәләге, эргәләге, яҡында (эргәлә) урынлашҡан, яҡында (эргәлә) ятҡан; **близлежа́щий го́род** яҡында ятҡан, (урынлашҡан) ҡала; **близлежа́щие райо́ны** яҡынтирәләге районд ар

**БЛИЗНЕЦЫ́** *мн.* (*ед.* **близне́ц** *м*) **1.** игеҙәктәр, игеҙ балалар **2.** *астр.* Игеҙәктәр (*йондоҙлоҡ*)

**БЛИЗОРУ́КИЙ,** -ая, -ое **1.** күрәш, күрәғарау; **близору́кие глаза́** күрәш күҙҙәр **2.** *перен.* (*непроницательный*) һуҡыр, алдан күрә белмәгән; **близору́кая поли́тика** һуҡыр сәйәсәт

**БЛИЗОРУ́КОСТЬ** *ж* **1.** күрәшлек **2.** *перен.* (*непроницательность*) һуҡырлыҡ, алдан күрә белмәү; **полити́ческая близору́кость** сәйәси һуҡырлыҡ

**БЛИ́ЗОСТЬ** *ж* **1.** (*близкий*) яҡынлыҡ; **бли́зость го́рода** ҡаланың яҡынлығы **2.** (*тесная дружеская связь*) яҡын мөнәсәбәт; **бли́зость отноше́ний** мөнәсәбәттәр яҡынлығы **3.** (*интимные отношения*) бәйләнеш, яҡынлыҡ; **физи́ческая бли́зость** енси бәйләнеш

**БЛИЗЬ** *ж* яҡын ара, яҡын ер

**БЛИК** *м* нур шәлкеме, яҡты шәүлә; **блик от со́лнца** ҡояштан төшкән нур шәлкеме; **блик от костра́** усаҡтан төшкән яҡты шәүлә

**БЛИН** *м* ҡоймаҡ; **горя́чие блины́** эҫе ҡоймаҡ; **печь блины́** ҡоймаҡ ҡойоу ♦ **пе́рвый блин ко́мом** тәү эш кәүеш

**БЛИНДА́Ж** *м*; *воен.* блиндаж; **постро́ить блинда́ж** блиндаж ҡороу

**БЛИНДА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* блиндаж …ы; **блинда́жные ба́лки** блиндаж урҙалар(ы); **блинда́жный лаз** блиндаж ауыҙы

**БЛИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡоймаҡ …ы; **бли́нная мука́** ҡоймаҡ оно **2.** *в знач. сущ.* **бли́нная** *ж* ҡоймаҡхана

**БЛИНТ** *м*; *типогр.* блинт (*китап тышлығына буяуһыҙ биҙәк, яҙыу баҫыу*)

**БЛИ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое ҡоймаҡтан ҡатлама; **бли́нчатый пиро́г** ҡоймаҡтан ҡатлама бәлеш

**БЛИ́НЧИКИ** *мн.* (*ед.* **бли́нчик** *м*) (*небольшие тонкие блины, обычно с начинкой*) ҡоймаҡ; **бли́нчики с тво́рогом** эремсек төрөлгән ҡоймаҡ

**БЛИСТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **блестя́щий** 2—4

**БЛИСТА́ТЬ** *несов. см.* **блесте́ть**

**БЛИЦ** *м* блиц (*фото төшөргәндә ҡапыл ғына көслө яҡтылыҡ бирә торған лампа, ҡыуыҡса*)

**БЛОК I** *м* блок, сығыр; **подня́ть бло́ком** сығыр менән күтәреү

**БЛОК II** *м* блок (**1.** *бер нисә дәүләт, фирҡә йәки ойошманың бергә эш итеү маҡсатында берләшеүе* **2.** *тех. бер нисә өлөштән торған ҡоролманың береһе, секция* **3.** *тех. бетон ҡушылмаһынан ҡойолған төҙөлөш материалы*)

**БЛОКА́ДА** *ж* **1.** блокада, ҡамау, ҡамалыш; **оста́ться в кольце́ блока́ды** ҡамау ҡулсаһында ҡалыу, ҡамауҙа ҡалыу **2.** *перен.* блокада; **полити́ческая блока́да** сәйәси блокада; **экономи́ческая блока́да** иҡтисади блокада; **фина́нсовая блока́да** финанс блокадаһы **3.** *физиол.* (*выключение функций какого-л. органа или системы*) блокада яһау, блокадалау; блокадаһы; **новокаи́новая блока́да** новокаин менән блокада яһау, новокаин блокадаһы

**БЛОКА́ДНЫЙ,** -ая, -ое блокада …ы, ҡамалыш; **блока́дное кольцо́** блокада ҡулсаһы; **блока́дные дни** блокада көндәре, ҡамалыш көндәре

**БЛОКГА́УЗ** *м*; *воен.* блокгауз (*хәрби оборона нығытмаһы*)

**БЛОКИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** блокадалау, блокада яһау, блокадаға алыу, ҡамау, ҡамап алыу, ҡамауҙа тотоу; **блоки́ровать порт** портты ҡамап алыу **2.** *перен.* ҡамасау яһау, ҡамасаулау; **блоки́ровать игрока́** уйынсыға ҡамасау яһау (*көсөн, хәлен алыу маҡсатында*) **3.** *ж.-д.* юлды ябыу; **блоки́ровать желе́зную доро́гу** тимер юлды ябыу

**БЛОКИ́РОВАТЬСЯ I** *сов., несов. см.* **блок** II 1 блокка инеү, берләшеү

**БЛОКИ́РОВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **блоки́ровать**

**БЛОКИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **блоки́ровать**, **блоки́роваться** I; **2.** *ж.-д.* блокировка (*поездар йөрөшөн механик рәүештә яйға, рәткә һала торған сигналдар системаһы*)

**БЛОКИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *ж.-д.* блокировка …ы; **блокиро́вочная систе́ма** блокировка системаһы; **блокиро́вочный сигна́л** блокировка сигналы

**БЛОКНО́Т** *м* блокнот, ҡуйын (кеҫә) дәфтәре

**БЛОКНО́ТНЫЙ,** -ая, -ое блокнот …ы; **блокно́тный лист** блокнот бите

**БЛОНДИ́Н** *м* блондин, һары сәсле ир-ат; **блонди́нка** *ж* блондинка, һары сәсле ҡатын-ҡыҙ

**БЛОХА́** *ж* бөрсә ♦ **земляна́я блоха́** ер бөрсәһе (*үҫемлек ҡортҡосо*); **лови́ть (вы́искивать) блох** *прост.* ваҡ-төйәк етешһеҙлек эҙләү, соҡоноу

**БЛО́ЧНЫЙ I,** -ая, -ое сығыр ...ы; **бло́чный кана́т** сығыр арҡаны

**БЛО́ЧНЫЙ II,** -ая, -ое *см.* **блок** II 2, 3

**БЛОШИ́НЫЙ,** -ая, -ое бөрсә ...ы; **блоши́ный уку́с** бөрсә тешләүе

**БЛУД** *м*; *уст.* уйнаш, зина, фәхеш, енси аҙғынлыҡ, аҙманлыҡ

**БЛУДИ́ТЬ I** *несов.*; *прост.* **1.** уйнаш итеү, зина (фәхеш) ҡылыу, аҙып-туҙып йөрөү **2.** урлашыу, урлау, ташыу (*бесәй тураһында*)

**БЛУДИ́ТЬ II** *несов.*; *прост.* аҙашыу; **блуди́ть по ле́су** урманда аҙашыу

**БЛУДЛИ́ВОСТЬ** *ж*; *прост.* уйнаш, зина, фәхишәлек, енси аҙғынлыҡ, йөрөмтәл булыу

**БЛУДЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** (*распутный*) аҙғын, боҙоҡ, зина (фәхеш) ҡылған, йөрөмтәл **2.** (*проказливый, вороватый*) аҙғын, аҙымтыҡ, тиләҫкәү; **блудли́вая ко́шка** аҙғын бесәй; **блудли́вая коро́ва** тиләҫкәү һыйыр

**БЛУДНИ́ЦА** *ж*; *прост.* уйнашсы ҡатын-ҡыҙ

**БЛУ́ДНЫЙ: блу́дный сын** *уст.* юлдан яҙған бала (малай)

**БЛУ́ДНЯ** *м* и *ж*; *прост. см.* **блуди́ть** I 2; **ко́шка-блу́дня** уғры бесәй

**БЛУЖДА́НИЕ** *с см.* **блужда́ть**; **блужда́ние в потёмках** ҡараңғылыҡта аҙашып йөрөү; **блужда́ние мы́слей** фекерҙәр сыуалыуы

**БЛУЖДА́ТЬ** *несов.* **1.** (*бродить, скитаться*) гиҙеп йөрөү, ҡыҙырыу, ҡыҙырыныу; **блужда́ть по у́лице** урам ҡыҙырыу; **блужда́ть по го́роду** ҡала буйлап ҡыҙырыныу **2.** (*бродить, плутать*) аҙашыу, аҙашып йөрөү; **блужда́ть по ле́су** урманда аҙашып йөрөү **3.** *чем* и *без доп.*; *перен.* (*о взгляде, глазах*) йүгереп (уйнап) тороу; (*о мыслях*) буталсыҡ хәлгә килеү, буталыу, сыуалыу

**БЛУЖДА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **блужда́ть 2.** *прил.* йүгерек, йылғыр; **блужда́ющий взгляд** йүгерек ҡараш; **блужда́ющие глаза́** йүгерек күҙҙәр ♦ **блужда́ющий нерв** *анат.* гиҙеүсе нерв; **блужда́ющая по́чка** *мед.* гиҙеүсе бөйөр; **блужда́ющие огни́** убыр уты (*төнөн яҡтырып күренгән фосфор газы*)

**БЛУ́ЗА** *ж* блуза (**1.** *киң ирҙәр күлдәге* **2.** *ҡатын-ҡыҙҙар итәк өҫтөнән кейә торған кофта*); **шёлковая блу́за** ебәк блуза; **наде́ть блу́зу** блуза кейеү

**БЛУ́ЗКА** *ж* блузка; **си́тцевая блу́зка** ситса блузка; **наде́ть блу́зку** блузка кейеү

**БЛЮ́ДО** *с* **1.** (*посуда*) табаҡ, таштабаҡ, ҙур тәрилкә **2.** (*кушанье*) ашамлыҡ, блюдо; **вку́сное блю́до** тәмле ашамлыҡ; **обе́д из трёх блюд** өс блюдолы төшкө аш ♦ **как на блю́де** ус төбөндәге кеүек күренеү

**БЛЮДОЛИ́З** *м*; *уст.* әрәмтамаҡ

**БЛЮ́ДЦЕ** *с* сынаяҡ аҫты, йәйкә; **фарфо́ровое блю́дце** фарфор йәйкә

**БЛЮ́МИНГ** *м*; *тех.* блюминг (*ҙур прокат станы*)

**БЛЮСТИ́** *несов. что* һаҡлау, күҙәтеү; **блюсти́ наро́дные интере́сы** халыҡ мәнфәғәтен һаҡлау; **блюсти́ дисципли́ну труда́** хеҙмәт тәртибен һаҡлау

**БЛЮСТИ́ТЕЛЬ** *м* и **БЛЮСТИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж чего*; *уст., теперь ирон.* һаҡлаусы, күҙәтеүсе, тотоусы; **блюсти́тель поря́дка** тәртип һаҡлаусы; **блюсти́тель зако́на** закондың (ҡанундың) үтәлешен күҙәтеүсе

**БЛЯ́ХА** *ж* **1.** айыл, айыл башы, айылса, таралғы, еҙ тәңкә; **ме́дная бля́ха** еҙ айыл; **застегну́ть бля́ху** айылды ҡаптырыу **2.** *уст.* (*металлическая пластина с надписью или номером*) бляха, номерлы ҡалай; **бля́ха сто́рожа** ҡарауылсы бляхаһы

**БОА́** *нескл.* **1.** *м* боа (*быуар йыландарҙың иң ҙуры*) **2.** *с*; *уст.* боа (*ҡауырһын мамығынан һ.б. бәйләнгән йәки затлы тиренән тегелгән ҡатын-ҡыҙ шарфы*); **боа́ из кру́жев** шау селтәр боа

**БОБ** *м* **1.** ноҡот, ноҡот борсағы **2.** *мн.* **бобы́** баҡса борсағы ♦ **гада́ть на боба́х** буш фараз менән булыу, хыял итеү; **оста́ться (сиде́ть) на боба́х** төп башына ултырып ҡалыу, һемәйеп (алданып) ҡалыу, алданыу, төпһөҙ санаға ултырыу, тишек кәмәгә (шүмәнгә) ултыртыу

**БОБЁР** *м* **1.** ҡондоҙ тиреһе **2.** *прост. см.* **бобр**

**БОБИ́НА** *ж* бобина, ҙур кәтүк; **магнитофо́нная боби́на** магнитофон бобинаһы

**БОБО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ноҡот ...ы, ноҡот борсағы ...ы; **бобо́вый стручо́к** ноҡот борсағы ҡуҙағы **2.** *в знач. сущ.* **бобо́вые** *мн.*; *бот.* ҡуҙаҡлылар

**БОБР** *м* ҡондоҙ; **бобри́ха** *ж*; *разг.* инә ҡондоҙ; **бобр боло́тный** һаҙ ҡондоҙо; **бобр речно́й** йылға ҡондоҙо; **охо́та на бобра́** ҡондоҙға һунар, ҡондоҙ аулау

**БОБРЁНОК** *м* ҡондоҙ балаһы, бала ҡондоҙ

**БО́БРИК** *м* **1.** бобрик, йөнтәҫ буҫтау; **пальто́ из бо́брика** йөнтәҫ буҫтау пальто **2.** *в знач. нареч.* **бо́бриком** ҡыҫҡа итеп, тырпайтып (*сәс алыу тураһында*); **во́лосы подстри́жены бо́бриком** сәсе ҡыҫҡа итеп тырпайтып алынған

**БО́БРИКОВЫЙ,** -ая, -ое бобрик; **бо́бриковое пальто́** бобрик пальто

**БОБРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡондоҙ(ҙар) ...ы; **бобро́вый запове́дник** ҡондоҙҙар ҡурсаулығы **2.** ҡондоҙ тиреһенән тегелгән, ҡондоҙ; **бобро́вый воротни́к** ҡондоҙ яға

**БОБСЛЕ́Й** *м*; *спорт.* бобслей (*рулле санала текә тауҙан шыуыу*)

**БОБЫ́ЛЬ** *м* **1.** *уст.* ерһеҙ ярлы крәҫтиән **2.** *разг.* яңғыҙ (япа-яңғыҙ, яңғыҙаҡ) кеше, һаҙаған ир (ҡатын); **жить бобылём** яңғыҙ йәшәү

**БОГ** *м* Алла, Хоҙай; **поклоня́ться Бо́гу** Аллаға табыныу; **ве́рить в Бо́га** Аллаға ышаныу ♦ **бог весть (зна́ет)** алла (хоҙай) белһен (белә); **бо́же!**; **бо́же мой!**; **бог мой!** йә хоҙай!; **дай бог** алла ярҙам бирһен; **как бог на́ душу поло́жит** нисек етте шулай; **не да́й бог (бо́же)**; **не приведи́ бог (бо́же)** хоҙай ҡушмаһын (күрһәтмәһен, һаҡлаһын); **не бог весть что (како́й)** иҫ китерлек түгел; **одному́ бо́гу изве́стно** бер алла белә, билдәһеҙ; **ра́ди бо́га** алла (хоҙай) хаҡына, алла (хоҙай) хаҡы өсөн; **сла́ва бо́гу**: 1) аллаға (хоҙайға) шөкөр; 2) бәхеткә күрә; **упаси́ (изба́ви, сохрани́) бог** алла (хоҙай) һаҡлаһын; **на бо́га наде́йся, а сам не плоша́й** аллаға тапшыр, дилбегәнде үҙең тот

**БОГАДЕ́ЛЬНЯ** *ж* **1.** ҡарт-ҡоролар (ғәриптәр) йорто (*революцияға тиклем Рәсәйҙә*) **2.** *разг.*, *ирон.* эшлекһеҙҙәр ояһы (*булдыҡһыҙ, эшлекһеҙ хеҙмәткәрҙәре күп булған ойошма*)

**БОГАРА́** *ж собир.*; *с.-х.* боғара (*Урта Азияла һуғарылмай торған сәсеүлектәр*)

**БОГА́РНЫЙ,** -ая, -ое боғара; **бога́рное земледе́лие** боғара игенселеге

**БОГАТЕ́Й** *м*; *прост.* бай, бай кеше

**БОГАТЕ́ТЬ** *несов.* байыу, байығыу; **бы́стро богате́ть** тиҙ байығыу

**БОГА́ТСТВО** *с* **1.** байлыҡ, бол, мал, дәүләт; **копи́ть бога́тство** бол йыйыу; **расточа́ть бога́тство** байлыҡты эрәм-шәрәм итеү; **накопи́ть бога́тство** байлыҡ туплау; **бере́чь наро́дное бога́тство** халыҡ байлығын һаҡлау **2.** ҡупшылыҡ, зиннәтлек, күркәмлек, гүзәллек; **бога́тство ю́жной приро́ды** көньяҡ тәбиғәтенең гүзәллеге; **бога́тство обстано́вки** йыһаздың күркәмлеге; **бога́тство наря́да** кейемдең ҡупшылығы **3.** *обычно мн.* **бога́тства** байлыҡтар, хазиналар; **приро́дные бога́тства** тәбиғи байлыҡтар; **духо́вные бога́тства** рухи хазиналар **4.** *чего* (*многообразие*) муллыҡ, төрлөлөк, күп төрлөлөк; **бога́тство урожа́я** уңыш муллығы; **бога́тство кра́сок** буяуҙар төрлөлөгө ♦ **здоро́вье доро́же бога́тства** һаулыҡ — ҙур байлыҡ

**БОГА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** бай; **бога́тая респу́блика** бай республика; **бога́тая приро́да** бай тәбиғәт; **бога́тая семья́** бай ғаилә **2.** *в знач. сущ.* **бога́тый** *м* бай **3.** (*роскошный*) ҡупшы, күркәм, матур, гүзәл; **бога́тый наря́д** ҡупшы кейем **4.** (*великолепный*) бик шәп (матур), бай; **бога́тый го́лос** бик шәп тауыш **5.** (*обильный*) мул, бай; **бога́тый урожа́й** мул уңыш; **бога́тые за́лежи** бай ятҡылыҡтар ♦ **чем бога́ты, тем и ра́ды** таҡта сәйем, яҡты сырайым; бары менән байрам; **бога́тый говори́т про своё бога́тство, бе́дный — про своё го́ре** бай — малын, ярлы зарын һөйләр

**БОГАТЫ́РСКИЙ,** -ая, -ое **1.** баһадир(ҙар), батыр(ҙар) ...ы, баһадирҙар (батырҙар) тураһында; **богаты́рские ска́зки** батырҙар тураһында әкиәттәр **2.** (*могучий, сильный*) баһадир(ҙар), батыр(ҙар) ...ы, бик көслө; **богаты́рского телосложе́ния** баһадир кәүҙәле, алпамыша кеүек ♦ **богаты́рский сон** *шутл.* ҡаты йоҡо

**БОГАТЫ́РЬ** *м* **1.** *уст.* батыр, алпамыша, алп; **ру́сские богатыри́** урыҫ батырҙары **2.** *перен.* бәһлеүән, баһадир, ир арыҫланы, батыр ул; **могу́чий богаты́рь** ғәйрәтле баһадир; **богатыри́ Ура́ла** Уралдың батыр улдары

**БОГА́Ч** *м* и *разг.* **БОГА́ЧКА** *ж* бай, бай кеше

**БОГДЫХА́Н** *м*; *уст.* богдыхан (*Ҡытай императоры*)

**БОГЕ́МА** *ж* **1.** *собир.* богема (*матди яҡтан тәьмин ителмәгән һәм торор урыны булмаған ғәмһеҙ тормошло зыялылар: актерҙар, музыканттар, яҙыусылар*) **2.** *разг.* богемасылыҡ (*шуларҙың тәртипһеҙ тормошо*)

**БОГЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* богема ...ы, богемасылыҡ ...ы; **боге́мная жизнь** богема тормошо

**БОГИ́НЯ** *ж* **1.** алиһә **2.** *уст.* фәрештә (*һөйгән ҡатынға ҡарата*)

**БОГОМА́З** *м*; *разг.* тәре төшөрөүсе

**БОГОМА́ТЕРЬ** *ж см.* **Богоро́дица**

**БОГОМО́Л** *м* **1.** аллаға табыныусы, ғибәҙәт ҡылыусы **2.** (*паломник*) хажи **3.** *мн.* **богомо́лы** *зоол.* суфый сиңерткәләр (*көньяҡта йәшәгән йыртҡыс бөжәктәр отрядының атамаһы*)

**БОГОМО́ЛЕЦ** *м см.* **богомо́л** 1, 2

**БОГОМО́ЛЬЕ** *с*; *уст.* ғибәҙәт ҡылыу, ғибәҙәткә йөрөү

**БОГОМО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое диндар, динсел; **богомо́льная стару́шка** динсел әбей

**БОГООТСТУ́ПНИК** *м*; *уст.* динһеҙ, диндән (алланан) баш тартыусы; дәһри

**БОГОРО́ДИЦА** *ж* Ғайса пәйғәмбәрҙең әсәһе (*христиан динендә*)

**БОГОСЛО́В** *м* **1.** (*специалист по богословию*) дин белгесе **2.** (*ученик духовной семинарии*) дини семинарияла уҡыған шәкерт

**БОГОСЛО́ВИЕ** *с* дини тәғлимәт

**БОГОСЛО́ВСКИЙ,** -ая, -ое дини; **богосло́вский факульте́т** дини факультет

**БОГОСЛУЖЕ́НИЕ** *с* ғибәҙәт, ғибәҙәт ҡылыу

**БОГОСТРОИ́ТЕЛЬСТВО** *с* аллагөруһсылыҡ (*XX б. тәүге ун йыллығында марксист әҙәбиәтселәр араһында тыуып, кешелектең эшмәкәрлеген дингә хеҙмәт итеү тип һанаған этик ағым*)

**БОГОТВОРИ́ТЬ** *несов.* *кого-что* **1.** (*преклоняться, обожать*) өҙөлөп (бик ныҡ) яратыу, табыныу, алла кеүек күреү **2.** (*обожествлять*) алла тип таныу, аллалаштырыу

**БОГОХУ́ЛЬНИК** *м*; *уст.* алланы яманлаусы (хурлаусы), көфөр һүҙҙәр һөйләүсе

**БОГОХУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* алланы яманлаған (хурлаған); **богоху́льные ре́чи** алланы яманлаған һүҙҙәр

**БОГОХУ́ЛЬСТВО** *с*; *уст.* алланы яманлау (хурлау), көфөрлөк

**БОГОХУ́ЛЬСТВОВАТЬ** *несов.*; *уст.* алланы яманлау (хурлау)

**БОДА́ТЬ** *несов. кого-что см.* **бодну́ть**

**БОДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*быть бодливым*) һөҙөшөү, һөҙгәк (һөҙөшкәк) булыу; **на́ша коро́ва бода́ется** беҙҙең һыйыр һөҙөшә **2.** (*бодать друг друга*) һөҙөшөү, төкөшөү; **ко́зы бода́ются** кәзәләр төкөшә

**БОДЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое һөҙгәк, һөҙгәк; **бодли́вый бык** һөҙгәк үгеҙ

**БОДНУ́ТЬ** *сов. кого-что* һөҙөп (төкөп) ебәреү

**БОДРИ́ТЬ** *несов. кого-что* күңелде (кәйефте) күтәреү, дәртләндереү, дәрт биреү, көс биреү; **моро́зный во́здух бодри́т** һалҡын һауа кәйефте күтәрә

**БОДРИ́ТЬСЯ** *несов.* дәртләнеү, дәртте һүндермәҫкә (кәйефте төшөрмәҫкә) тырышыу, батырланыу, йөрәкләнеү, ҡыйыуланыу

**БО́ДРОСТЬ** *ж* дәрт, дәртлелек, күңел (кәйеф) күтәренкелеге, күңел көрлөгө, рухи күтәренкелек; **бо́дрость ду́ха** рух күтәренкелеге

**БО́ДРСТВОВАНИЕ** *с см.* **бо́дрствовать**

**БО́ДРСТВОВАТЬ** *несов.* йоҡламау, уяу булыу; **бо́дрствовать всю ночь** төн буйына йоҡламай сығыу

**БО́ДРЫЙ,** -ая, -ое **1.** дәртле, таҙа, ныҡ, теремек; **бо́дрый стари́к** теремек ҡарт **2.** (*весёлый, оживлённый*) шат, күтәренке (көр) күңелле; **бо́дрое настрое́ние** күтәренке кәйеф

**БОДРЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **бодри́ть** **2.** *прил.* (*вызывающий чувство бодрости*) күңел (кәйеф) күтәрә торған; **бодря́щий напи́ток** кәйеф күтәрә торған эсемлек

**БОДЯ́К** *м* билсән (*ҡый үләне*)

**БОЕВИ́К** *м* боевик (**1.** *1905—1907 йй. күтәрелештәрҙә ҡатнашҡан эшселәр дружинаһы ағзаһы* **2.** *ҡоралды бәрелештәр, һуғыш-талаш, үлтереште сағылдырған фильм* **3.** *йәмғиәттең ниндәйҙәр бер ҡатламының мәнфәғәтен яҡлаусы ҡоралды төркөм ағзаһы*)

**БОЕВИ́ТОСТЬ** *ж* ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, баҙнатлыҡ, эшлеклелек; **боеви́тость молодёжи** йәштәрҙең тәүәккәллеге

**БОЕВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡыйыу, тәүәккәл, баҙнатлы, эшлекле; **боеви́тый вид** тәүәккәл ҡиәфәт

**БОЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** һуғыш ...ы, яу ...ы, хәрби; **боево́е зада́ние** хәрби задание; **боева́я подгото́вка** хәрби әҙерлек; **боево́й конь** һуғыш аты; **боево́й уста́в** хәрби устав **2.** (*воинствующий*) һуғышсан; **боево́й дух** һуғышсан рух **3.** (*смелый, решительный*) ҡыйыу, сая, тәүәккәл, үткер; **боево́й па́рень** үткер егет **4.** (*особо важный*) бик мөһим, беренсе сираттағы; **боева́я те́ма** мөһим тема ♦ **боево́й листо́к** боевой листок

**БОЕГОЛО́ВКА** *ж* боеголовка (*ракетаның, снарядтың шартлатҡыс механизм ҡуйылған алғы өлөшө, башы*)

**БОЁК** *м* **1.** (*в оружии*) боёк, саҡма һуҡҡыс **2.** (*у парового молота*) боёк, һуҡҡыс **3.** тәпәс (*оҙон һапҡа тағылған, тукмаҡ һымаҡ ашлыҡ һуҡҡыс, элекке ҡорал*); **молоти́ть хлеб бойко́м** ашлыҡты тәпәс менән һуғыу

**БОЕКОМПЛЕ́КТ** *м*; *воен.* һуғыш комплекты (*кәрәкле күләмдәге һуғыш кәрәк-яраҡтары*)

**БОЕПИТА́НИЕ** *с*; *воен.* һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү; **слу́жба боепита́ния** һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү хеҙмәте

**БОЕПРИПА́СЫ** *мн.*; *воен.* һуғыш припастары, һуғыш кәрәк-яраҡтары (*снарядтар, патрондар, миналар һ.б.*)

**БОЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* һуғышҡа (көрәшкә) һәләтлек; **боеспосо́бность а́рмии** армияның һуғышҡа һәләтлеге

**БОЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое һуғышҡа (көрәшкә) һәләтле; **боеспосо́бные ча́сти** һуғышҡа һәләтле частар

**БОЕ́Ц** *м* **1.** (*участник боёв, воин*) яугир, һуғышсы; **бойцы́ Вели́кой Оте́чественной войны́** Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары **2.** *перен.* (*тот, кто борется за что-л.*) көрәшеүсе, көрәшсе; **бойцы́ за свобо́ду** азатлыҡ өсөн көрәшселәр **3.** (*рядовой воин, солдат*) һалдат; **бойцы́ партиза́нского отря́да** партизан отряды һалдаттары **4.** (*в кулачном бою*) көрәшсе, ярышсы

**БО́ЖЕ** *см.* **Бог**

**БО́ЖЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* алла ...ы, хоҙай ...ы **2.** *разг.* (*подходящий, приемлемый*) яраҡлы, ярарлыҡ, килешерлек, йәтеш; **бо́жеские усло́вия** ярарлыҡ шарттар; **бо́жеская цена́** ярарлыҡ хаҡ

**БОЖЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* алла ...ы, хоҙай ...ы; **боже́ственный глаго́л** хоҙай һүҙе **2.** (*относящийся к религии, церковный*) дини, илаһи; **боже́ственные кни́ги** дини китаптар **3.** *разг.* (*прекрасный, дивный*) гүзәл, һоҡландырғыс, ғәжәп матур, иҫ киткес; **боже́ственный го́лос** иҫ киткес матур тауыш

**БОЖЕСТВО́** *с* алла, хоҙай

**БО́ЖИЙ,** -ья, -ье алла ...ы, хоҙай ...ы; **бо́жья во́ля** хоҙай ирке; **бо́жий суд** алла хөкөмө ♦ **бо́жья коро́вка**: 1) *зоол.* сыбар һыйыр, ҡамҡа, сыуаҡ апай, ҡояш апай; 2) *ирон.* алла бәндәһе (*үтә йыуаш кеше*); **раб бо́жий** алла бәндәһе; **ка́ждый бо́жий день** һәр көн, көн һайын, алланың бирмеш көнө; **я́сно как бо́жий день** көн кеүек асыҡ, ап-асыҡ

**БОЖИ́ТЬСЯ** *несов.* ант итеү; **не божи́тесь, я ве́рю вам** ант итмәгеҙ, мин һеҙгә ышанам

**БОЖО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **бог** **2.** бот, алла һыны **3.** (*о человеке, вызывающем обожание, преклонение*) ҡәҙерле (хөрмәтле) кеше, кумир

**БОЙ** *м* **1.** (*битва, сражение*) һуғыш, көрәш, яу; **наступа́тельный бой** һөжүм һуғышы; **оборони́тельный бой** ҡурғауыл һуғышы; **возду́шный бой** һауа һуғышы; **рукопа́шный бой** ҡул һуғышы; **по́ле бо́я** яу ҡыры; **вести́ бой** һуғыш алып барыу **2.** *прост.* (*драка, побои*) һуғышыу, туҡмау, уҫмаҡ; **бить сме́ртным бо́ем** үлтергәнсе туҡмау **3.** (*борьба, состязание*) ярыш, ярышыу, көрәш, көрәшеү; **приёмы бо́я** көрәш ысулдары; **уча́ствовать в больши́х боя́х** ҙур көрәштәрҙә (ярыштарҙа) ҡатнашыу **4.** *собир.* (*разбитые стеклянные и другие предметы*) ярсыҡ, ватыҡ, сарпы; **кирпи́чный бой** кирбес ватығы **5.** һуйыу, салыу; **бой скота́** мал һуйыу **6.** (*бить*) һуғыу, ҡағыу; **бараба́нный бой** барабан ҡағыу; **бой часо́в** сәғәт һуғыуы **7.** атыу, атыу көсө; **прове́рить бой автома́та** автоматтың атыу көсөн тикшереү ♦ **брать (взять) с бо́ю** һуғышып алыу; **объяви́ть бой** *чему́* көрәш иғлан итеү

**БОЙ-...: бой-ба́ба** *разг.* ут бисә

**БО́ЙКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*решительный, находчивый, смелый*) ҡыйыу, үткер, сая, оҫҡор, тәүәккәл, баҙнатлы; **бо́йкий ма́льчик** ҡыйыу малай; **бо́йкий челове́к** тәүәккәл кеше; **бо́йкая же́нщина** сая ҡатын **2.** (*живой, быстрый*) етеҙ, өлгөр, теремек, тилбер, йылдам; **бо́йкий ум** етеҙ аҡыл; **бо́йкий отве́т** үткер яуап **3.** (*оживлённый*) халыҡ ҡайнап торған, йәнле; **бо́йкая у́лица** халыҡ ҡайнап торған урам ♦ **бо́йкое перо́** *у кого* үткер ҡәләм; **бо́йкий на язы́к** телгә оҫта, үткер телле

**БО́ЙКОСТЬ** *ж* ҡыйыулыҡ, үткерлек, саялыҡ; **бо́йкость хара́ктера** холоҡ саялығы

**БОЙКО́Т** *м* бойкот; **объяви́ть бойко́т** бойкот белдереү

**БОЙКОТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* бойкот яһау (белдереү)

**БО́ЙЛЕР** *м* бойлер (*һыу йылытыу системаһындағы йайланма*)

**БО́ЙЛЕРНАЯ** *ж* бойлер бинаһы

**БОЙНИ́ЦА** *ж* бойница (*нығытмаларҙан дошманға атыу өсөн ҡалдырылған тишек*)

**БО́ЙНЯ** *ж* **1.** бойня, мал һуйыу (салыу) урыны **2.** (*резня, побоище*) ҡан ҡойош, һуйыш-ҡырылыш, үлеш-ҡырылыш, һуйыш, ҡырылыш; **крова́вая бо́йня** ҡанлы һуйыш-ҡырылыш

**БОЙСКА́УТ** *м* бойскаут (*скауттар ойошмаһының ағзаһы*)

**БОК** *м* **1.** яҡ, ян, ҡабырға, эргә; **лечь на пра́вый бок** уң яҡҡа ятыу; **ко́лет в боку́** ҡабырғам сәнсә **2.** (*сторона какого-л. предмета*) яҡ, ҡыр, сит; **бок стола́** өҫтәл сите ♦ **бок о́ бок** бер-береһенә терәлеп, йәнәш, иңгә-иң терәп; **взять (брать) за бока́** *кого* яғаһынан алыу, ҡыҫырыҡлау; **лежа́ть на боку́** ҡырын ятыу, эшһеҙ ятыу; **намя́ть бока́** *кому*; *прост.* ҡабырғаһын һанау; **под бо́ком** яҡында (эргәлә) генә, бик яҡын, яп-яҡын

**БОКА́Л** *м* бокал; **хруста́льный бока́л** гәлсәр бокал ♦ **подня́ть бока́л** *за кого-что* бокал күтәреү, тост әйтеү

**БОКОВИ́НА** *ж*; *прост.*, *спец.* ҡабырға, яндауыр; **бокови́на дива́на** диван яндауыры

**БОКОВО́Й,** -ая, -ое эргә (ҡабырға) яҡтағы, эргәләге, ҡабырғалағы, ситтәге; **бокова́я ко́мната** эргә яҡтағы бүлмә; **боково́е окно́** ҡабырға яҡтағы тәҙрә ♦ **отпра́виться на бокову́ю** йоҡларға ятыу

**БО́КОМ** *нареч.* **1.** (*плечом вперёд*) ҡабырға (ян) менән; **стоя́ть бо́ком** ҡабырға менән тороу **2.** *разг.* (*не прямо, искоса*) ситләтеп, ҡырын, ҡырын-мырын, күҙ сите менән; **погля́дывать бо́ком** ҡырын-мырын ҡарап алыу ♦ **вы́йти бо́ком** *кому*; *прост.* насар (киреһенсә) килеп сығыу

**БОКС I** *м*; *спорт.* бокс; **занима́ться бо́ксом** бокс менән шөғөлләнеү

**БОКС II** *м* (*мужская стрижка*) бокс; **стричь под бокс** сәсте бокс итеп алыу

**БОКС III** (*изолятор*) бокс; **положи́ть больно́го в бокс** ауырыуҙы боксҡа һалыу

**БОКСЁР I** *м* боксёр (спортсы); **боксёр сре́днего ве́са** урта ауырлыҡтағы боксёр; **боксёр тяжёлого ве́са** ауыр ауырлыҡтағы боксёр

**БОКСЁР II** *м* боксёр (*эт тоҡомо*)

**БОКСЁРСКИЙ,** -ая, -ое боксёрҙар ...ы, боксёрҙарға хас; **боксёрское состяза́ние** боксёрҙар ярышы; **боксёрские перча́тки** боксёрҙар бирсәткәһе; **боксёрский приём** боксёрҙарға хас алым

**БОКСИ́РОВАТЬ** *несов.* бокс менән шөғөлләнеү, боксҡа алышыу, уҫмаҡлау

**БОКСИ́Т** *м* боксит (*иң яҡшы алюмин мәғдәне*)

**БОКСИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое боксит ...ы; **бокси́товая руда́** боксит мәғдәне; **бокси́товое месторожде́ние** боксит ятҡылығы

**БОЛВА́Н** *м* **1.** *прост.* бүкән, түмәр **2.** (*деревянная, картонная и т.п. форма, на которую натягивают головные уборы, парики*) ҡалып; **шля́пный болва́н** эшләпә ҡалыбы **3.** *бран.* (*о бестолковом, глупом человеке*) маҡау, аңра, белекһеҙ, күҙле бүкән **4.** *уст.* (*идол*) бот

**БОЛВА́НКА** *ж* **1.** *тех.* болванка **2.** болванка (*ниҙер яһау өсөн әҙерләнгән тимер, ағас һ.б. киҫәге*) **3.** *см.* **болван** 2

**БОЛГА́РСКИЙ,** -ая, -ое болгар(ҙар) ...ы, Болгария ...ы; **болга́рский язы́к** болгар теле; **болга́рский наро́д** Болгария (болгар) халҡы; **болга́рская пе́сня** болгар йыры

**БОЛГА́РЫ** *мн.* болгарҙар, болгар халҡы // *ед.* **болга́рин** *м* болгар ир-аты; **болга́рка** *ж* болгар ҡатын-ҡыҙы

**БОЛЕВО́Й,** -ая, -ое ауыртыу; **болево́е ощуще́ние** ауыртыу һиҙеү; **болева́я то́чка** ауыртҡан урын

**БО́ЛЕЕ 1.** *см.* **бо́льше 2.** *в сочетании с нареч. и прил. образует сравн. ст.* -раҡ/-рәк, -ыраҡ/-ерәк; **бо́лее краси́вый цвето́к** матурыраҡ сәскә; **бо́лее кре́пкий чай** ҡатыраҡ сәй ♦ **бо́лее или ме́нее** аҙмы-күпме, күпмелер, бер аҙ, бер ни тиклем; **не бо́лее и не ме́нее как** артыҡ та, кәм дә түгел; теп-теүәл генә; **бо́лее чем** бик, сиктән тыш, һуң дәрәжәлә, бигерәк тә, бөтөнләй; **бо́лее того́** улай ғына түгел, унан да бигерәк; **да́лее — бо́лее** барған (торған) һайын

**БОЛЕ́ЗНЕННОСТЬ** *ж* **1.** ауырыусан (сирләшкә) булыу, сәләмәтлек насар булыу, сырхаулыҡ; **боле́зненность ребёнка** баланың сирләшкә булыуы **2.** ауыртынып (әрнеп) тороу; **боле́зненность ра́ны** йәрәхәттең ауыртып тороуы

**БОЛЕ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*часто болеющий*) ауырыусан, сирләүсән, сирләшкә, сырхау; **боле́зненный ребёнок** сирләшкә бала **2.** ауырыуҙы (сирҙе, сырхауҙы) белдергән, ауырыу (сир, сырхау) билдәһе булған; **боле́зненный румя́нец** сырхау ҡыҙыллыгы; **боле́зненный вид** сырхау ҡиәфәт; **боле́зненная полнота́** ауырыуҙан булған йыуанлыҡ (һимеҙлек) **3.** *перен.* сиктән (саманан) тыш, үтә көслө (ауыр); **боле́зненное восприя́тие** үтә ауыр ҡабул итеү; **боле́зненное самолю́бие** саманан тыш үҙен яратыу **4.** (*причиняющий нравственную боль*) ауырттыра (әрнетә) торған, йөрәк әрнеткес, йөрәкте әрнетә (рәнйетә) торған; **боле́зненное воспомина́ние** йөрәкте әрнетә торған хәтирә **5.** (*вызывающий боль*) ғазаплы, әрнеүле; **боле́зненный стон** ғазаплы ыңғырашыу; **боле́зненный уко́л** ауырттыра торған укол

**БОЛЕЗНЕТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое ауырыу (сир) тыуҙырыусы, ауырыу (сир) таратыусы, ауырыу (сир) тыуҙыра торған, ауырыуға (сиргә) сәбәп булған; **болезнетво́рные микро́бы** ауырыу тыуҙырыусы микробтар

**БОЛЕЗНЕУСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое ауырыуға (сиргә) бирешмәй торған; **болезнеусто́йчивый сорт виногра́да** йөҙөмдөң ауырыуға бирешмәй торған сорты

**БОЛЕ́ЗНЬ** *ж* ауырыу, сир, хәстә, сырхау; **зара́зная боле́знь** йоғошло ауырыу; **глазны́е боле́зни** күҙ ауырыуҙары; **де́тские боле́зни** балалар ауырыуы; **тяжёлая боле́знь** ҡаты ауырыу

**БОЛЕ́ЛЬЩИК** *м* и **БОЛЕ́ЛЬЩИЦА** *ж*; *разг.* **1.** борсолған, ҡайғырҡан, хәстәрлек (ярҙам) күрһәткән кеше **2.** *спорт.* көйәрмән; **боле́льщики кома́нды "Салава́т Юла́ев"** "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәре

**БОЛЕРО́** *с нескл.* болеро (*испандарҙың милли бейеүе һәм музыкаһы*); **танцева́ть болеро́** болеро бейеү

**БОЛЕ́ТЬ I** *несов.* **1.** *чем* ауырыу, сирләү, сырхап тороу; **боле́ть ти́фом** тиф менән ауырыу **2.** *за кого-что, о ком-чём*; *перен.* борсолоу, ҡайғырыу, әрнеү; **боле́ть за коллекти́в** коллектив өсөн борсолоу; **боле́ть за де́ло** эш өсөн ҡайғырыу **3.** *за кого-что*; *перен., разг.* яныу, көйөү, көйөнөү; **боле́ть за люби́мую кома́нду** яратҡан командаң өсөн көйөү ♦ **боле́ть душо́й (се́рдцем)** *за кого-что, о ком-чём* и *без доп.* ныҡ борсолоу, көйөү, ҡайғырыу, йән әсеү, йөрәк һыҙлау

**БОЛЕ́ТЬ II** *несов.* ауыртыу, һыҙлау, зеңкеү; **голова́ боли́т** баш ауырта; **зу́бы боля́т** теш(тәр) һыҙлай ♦ **душа́ (се́рдце) боли́т** йөрәк һыҙлай, күңел әрней, йөрәк һыҡрай, йән әсей

**БОЛЕУТОЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее ауыртыуҙы (һыҙлауҙы) баҫа торған; **болеутоля́ющие сре́дства** ауыртыуҙы баҫа торған саралар

**БОЛИВИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое боливий ...ы, Боливия ...ы; **боливи́йский наро́д** Боливия халҡы

**БОЛИВИ́ЙЦЫ** *мн.* боливийҙар, боливий халҡы // *ед.* **боливи́ец** *м* боливий ир-аты; **боливи́йка** *ж* боливий ҡатын-ҡыҙы

**БОЛИ́Д** *м*; *астр.* болид (*баҙыҡ метеор*)

**БОЛО́НКА** *ж* болонка (*оҙон йомшаҡ йөнлө өй эте*)

**БОЛО́НЬЯ** *ж* болонья (*капрон туҡыма*)

**БОЛО́ТИНА** *ж*; *прост.* һаҙлауыҡ урын

**БОЛО́ТИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаҙмат, һаҙамыҡ, һаҙлауыҡ; **боло́тистое ме́сто** һаҙмат урын; **боло́тистый луг** һаҙамыҡ болон **2.** (*топкий*) батҡыл; **боло́тистый бе́рег** батҡыл яр; **боло́тистая ме́стность** батҡыл ер (урын)

**БОЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаҙ ...ы, һаҙлыҡ ...ы; **боло́тная пти́ца** һаҙ ҡошо; **боло́тная трава́** һаҙ үләне; **боло́тные сапоги́** һаҙ итеге; **боло́тный газ** һаҙ газы **2.** (*о цвете*) йәшкелт-һоро; **боло́тный цвет** йәшкелт-һоро төҫ

**БОЛО́ТО** *с* **1.** һаҙ, һаҙлыҡ; **торфяно́е боло́то** торф һаҙлығы; **осуши́ть боло́то** һаҙлыҡты киптереү **2.** *чего, какое*; *перен.* һаҙлыҡ, торғонлоҡ; **обыва́тельское боло́то** обывателлек һаҙлығы

**БОЛТ** *м* **1.** болт (*бер осо ҡалпаҡлы, икенсеһе гайка бороп индерә торған һырлы металл стержень*) **2.** (*железный прут*) арҡыры тимер; **запира́ть дверь на болт** ишеккә арҡыры тимер һалып бикләү

**БОЛТА́НКА** *ж*; *разг.* һауа упҡыны; **самолёт попа́л в болта́нку** самолёт һауа упҡынына эләкте

**БОЛТА́ТЬ I** *несов.* **1.** *что* (*взболтать*) болғатыу, бутау; **болта́ть лека́рство** дарыуҙы бутау **2.** *чем* һелкеү, һелкетеү; **болта́ть нога́ми** аяҡтарҙы һелкетеү **3.** *кого-что безл.*; *разг.* (*покачивать из стороны в сторону*) сайҡау, сайҡатыу, бәүетеү

**БОЛТА́ТЬ II** *несов.*; *разг.* **1.** *что* и *без доп.* юҡ-бар һөйләү, гәп (сафсата, ләстит) һатыу, лаҡылдау, ләпелдәү, таҡылдау; **болта́ть вздор** юҡ-бар һөйләү; **болта́ть без у́молку** бер туҡтауһыҙ таҡылдау **2.** (*проговариваться*) әйтеп һалыу, яңылыш әйтеп (һөйләп) ташлау, ыҫҡындырып ебәреү; **болта́ть о свои́х наме́рениях** үҙ уйҙарыңды һөйләп ташлау **3.** (*бегло говорить на каком-л. иностранном языке*) һөйләшеү, һөйләшә алыу (белеү); **болта́ть по-францу́зски** французса һөйләшеү

**БОЛТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* һалпылдау, һалбырау, һәлберәү, һалпылдап (һалбырап, аҫылынып) тороу; **коне́ц по́яса болта́ется** билбау осо һалбырап тора **2.** *на ком-чём*; *разг.* (*свободно свисать, двигаться, не прилегая*) киң (бушаҡ) булыу, һалынып (эсендә уйнап, һалбырап) тороу; **пиджа́к болта́лся на нём** (уның) пинжәге үҙенә киң **3.** *прост.* (*ходить без дела*) һәптәнләп (буталып) йөрөү; **болта́ться по у́лицам** урам буйлап һәптәнләп йөрөү

**БОЛТЛИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** һөйләнсәк; **мне не нра́вится его́ болтли́вость** миңә уның һөйләнсәклеге оҡшамай **2.** (*неумение хранить тайну*) һүҙ (сер) тотмау (һаҡламау), асыҡ ауыҙлыҡ

**БОЛТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** күп һөйләүсән (һөйләнеүсән), һөйләнсәк, һүҙгә әүәҫ (оҫта), телдәр; **болтли́вый собесе́дник** һүҙгә әүәҫ әңгәмәсе **2.** һүҙ (сер) тотмаҫ (һаҡламаҫ), асыҡ ауыҙ; **болтли́вая девчо́нка** сер тотмаҫ ҡыҙыҡай

**БОЛТНУ́ТЬ** *сов. разг.* әйтеп һалыу, әйтеп ыҫҡындырыу

**БОЛТОВНЯ́** *ж*; *разг.* **1.** (*бессодержательные разговоры*) ләстит, буш (юҡ) һүҙ, һүҙ бутҡаһы, сафсата; **бесполе́зная болтовня́** файҙаһыҙ һүҙ бутҡаһы **2.** (*сплетня*) ғәйбәт, уйҙырма; **занима́ться болтовнёй** ғәйбәт һатыу

**БОЛТОВО́Й,** -ая, -ое болт ...ы; **болтова́я га́йка** болт гайкаһы

**БОЛТУ́Н I** *м* и **БОЛТУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* ләстит һатыусы, тел бицтәһе

**БОЛТУ́Н II** *м* (*насиженное яйцо без зародыша*) серетке

**БОЛТУ́ШКА I** *м* и *ж*; *разг.*, *ласк. от* **болту́н** I

**БОЛТУ́ШКА II** *ж*; *разг.* **1.** (*жидкая пища*) боламыҡ, апара, ашлы һыу; **де́лать болту́шку** боламыҡ яһау **2.** *разг.* (*яичница на молоке*) тәбейә, йомортҡа тәбейәһе; **гото́вить болту́шку** тәбейә бешереү **3.** (*орудие для взбалтывания*) туҡығыс; **разме́шивать болту́шкой** туҡығыс менән туҡыу

**БОЛЬ** *ж* ауыртыу, әрнеү, һыҙлау; **головна́я боль** баш ауыртыуы; **зубна́я боль** теш һыҙлауы; **боль ути́хла** һыҙлау баҫылды; **душе́вная боль** күңел әрнеүе

**БОЛЬНИ́ЦА** *ж* хәстәхана, больница; **де́тская больни́ца** балалар хәстәханаһы; **положи́ть в больни́цу** хәстәханаға һалыу; **вы́писаться из больни́цы** хәстәхананан сығыу

**БОЛЬНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое хәстәхана (больница) ...ы; **больни́чный режи́м** хәстәхана режимы; **больни́чный хала́т** хәстәхана халаты ♦ **больни́чный лист** больничный лист, ауырығанлыҡ ҡағыҙы

**БО́ЛЬНО I 1.** *нареч.* ауырттырып, ауырттырғансы; **бо́льно уда́рить** ауырттырғансы һуғыу **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* ауырта, һыҙлай, ауыр, ҡыйын; **уша́м бо́льно** ҡолаҡ ауырта; **бо́льно слы́шать э́ту весть** был хәбәрҙе ишетеүе ауыр; **мне бо́льно дыша́ть** миңә тын алыуы ҡыйын ♦ **сде́лать бо́льно** *кому* рәнйетеү

**БО́ЛЬНО II** *нареч.*; *прост.* бик, бик ныҡ, үтә, артыҡ; **бо́льно мно́го** бик күп; **бо́льно хитёр** үтә хәйләкәр

**БОЛЬНО́Й,** -ая, -ое **1.** ауырыу, сирле, сырхау; **больно́й ребёнок** ауырыу бала; **больно́е се́рдце** сирле йөрәк **2.** *в знач. сущ.* **больно́й** *м* и **больна́я** *ж* ауырыу, сырхау, сирле (кеше); **приём больны́х** ауырыуҙар ҡабул итеү; **больна́я вста́ла на́ ноги** ауырыу (ҡатын-ҡыҙ) аяҡҡа баҫты **3.** *перен.* (*неестественный, ненормальный*) тейешле йөкмәткеһе (сифаты) булмаған, һуҡыр, буш, ҡыҫыр; **больно́е воображе́ние** буш хыял; **люби́ть больно́й любо́вью** һуҡыр мөхәббәт менән яратыу ♦ **больно́й вопро́с** ҡыйын (ҡатмарлы, сетерекле) мәсьәлә; **больно́е ме́сто** ауыртҡан урын, йомшаҡ ер; **(вали́ть) с больно́й головы́ на здоро́вую** аҡ эт бәләһе — ҡара эткә; үҙ ғәйебен башҡа кешегә ауҙарыу

**БОЛЬША́К** *м*; *разг.* оло юл

**БО́ЛЬШЕ 1.** *сравн. ст. от* **большо́й** и **вели́кий** 1, 2 ҙурыраҡ, дәүерәк, өлкәнерәк; **дом де́да большо́й, а наш ещё бо́льше** олатайҙың өйө ҙур, ә беҙҙеке унан да ҙурыраҡ **2.** *сравн. ст. от* **мно́го** күберәк, артығыраҡ; **прошло́ бо́льше двух ме́сяцев** ике айҙан артығыраҡ ваҡыт үтте **3.** *нареч.* (*далее, впредь, уже*) бынан кире (һуң, ары, былай), бүтән, инде, башҡа; **бо́льше туда́ не пойду́** бүтән унда бармайым; **бо́льше так не бу́ду** бынан һуң улай эшләмәм; **бо́льше не могу́** башҡа булдыра алмайым ♦ **бо́льше того́** улай ғына ла түгел

**БОЛЬШЕВИЗА́ЦИЯ** *ж* большевиклаштырыу, большевизм рухында тәрбиәләү

**БОЛЬШЕВИ́ЗМ** *м* большевизм (*XX б. башында Рәсәйҙә барлыҡҡа килгән марксистик-революцион ағым*)

**БОЛЬШЕВИ́К** *м* и **БОЛЬШЕВИ́ЧКА** *ж* большевик

**БОЛЬШЕВИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** большевиктар ...ы; **большеви́стская па́ртия** большевиктар фиркәһе **2.** большевистик, большевиктарса; **большеви́стская та́ктика** большевистик тактика



4 зак. 2.0084.05

**БОЛЬШЕГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҙур (оло) башлы; **большеголо́вый, тонконо́гий жеребёнок** ҙур башлы, нәҙек тояҡлы ҡолон

**БОЛЬШЕГРУ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ауыр йөклө, ауыр йөк ташый торған; **большегру́зный ваго́н** ауыр йөклө вагон

**БО́ЛЬШИЙ,** -ая, -ее *сравн. ст. от* **большо́й** и **вели́кий** 1, 2 ҙурыраҡ, ҙурырағы, күберәк, артыҡ, артығырағы ♦ **бо́льшей ча́стью**; **по бо́льшей ча́сти** күпселектә; **са́мое бо́льшее** иң күбеһе, күп тигәндә

**БОЛЬШИНСТВО́** *с* күпселек; **большинство́ голосо́в** күпселек тауыш; **подавля́ющее большинство́** иң ҙур күпселек ♦ **в большинстве́ слу́чаев** күпселектә, күпселек осраҡта

**БОЛЬШО́Й,** -ая, -ое **1.** ҙур, эре, дәү; **больши́е глаза́** ҙур күҙҙәр; **большо́е хозя́йство** эре хужалыҡ; **большо́й го́род** ҙур ҡала; **большо́й зал** ҙур зал; **большо́й пёс** дәү эт; **большо́й расска́з** ҙур хикәйә; **больша́я ско́рость** ҙур тиҙлек **2.** ҙур, күп, ишле; **больша́я семья́** ишле ғаилә; **больши́е де́ньги** күп аҡса **3.** бик күп, мул; **больша́я нефть** мул нефть **4.** оҙайлы, оҙон, ҙур; **большо́й срок** ҙур срок; **больша́я переме́на** оҙон тәнәфес **5.** ҙур, оло, әһәмиәтле, мөһим; **больша́я побе́да** оло еңеү; **большо́й успе́х** ҙур уңыш; **большо́й пра́здник** оло байрам; **большо́е собы́тие** оло ваҡиға; **больша́я ра́дость** оло ҡыуаныс **6.** (*выдающийся*) күренекле, ҙур; **большо́й писа́тель** күренекле яҙыусы; **большо́й челове́к** ҙур кеше **7.** *разг.* (*взрослый*) ҙур, үҫкән; **большо́й ма́льчик** ҙур малай **8.** *в знач. сущ.* **больши́е** *мн.* өлкәндәр, ололар, ҙурҙар; **больши́е не пла́чут** өлкәндәр иламай; **слу́шаться больши́х** ололарҙы тыңлау ♦ **больша́я бу́ква** баш (ҙур) хәреф; **больша́я доро́га** оло юл; **Больша́я Медве́дица** *астр.* Етегән йондоҙ; **большо́й па́лец** баш бармаҡ

**БОЛЯ́ЧКА** *ж*; *разг.* һыҙлауыҡ, сиҡан, ҡутыр; **появле́ние боля́чек** (*на теле*) һыҙлауыҡ сығыу

**БО́МБА** *ж* бомба; **зажига́тельная бо́мба** яндырғыс бомба; **фуга́сная бо́мба** фугас бомба; **а́томная бо́мба** атом бомбаһы ♦ **влете́ть бо́мбой (как бо́мба)** уҡтай атылып килеп инеү

**БОМБАРДИ́Р** *м* **1.** бомбардир (*иҫк. Рәсәй армияһында һәм флотында тупсы һалдат*) **2.** *разг.* һөжүм итеүсе, уйынсы (*футболда, хоккейҙа һ.б.*) **3.** ҡуңыҙ

**БОМБАРДИРОВА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** бомбаға (тупҡа, утҡа) тотоу; **бомбардирова́ть го́род** ҡаланы утҡа тотоу **2.** *чем*; *перен.*, *ирон.*, *разг.* йөҙәтеү, теңкәгә тейеү, аптыратып (йөҙәтеп) бөтөрөү; **бомбардирова́ть пи́сьмами** хаттар яҙып йөҙәтеп бөтөрөү

**БОМБАРДИРО́ВКА** *ж см.* **бомбардирова́ть**

**БОМБАРДИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое бомбардировка ...ы, бомбаға (тупҡа, утҡа) тота торған; **бомбардиро́вочная авиа́ция** бомбардировка авиацияһы

**БОМБАРДИРО́ВЩИК** *м* **1.** бомбардировщик, бомбаға (тупҡа, утҡа) тотоусы; **тяжёлый бомбардиро́вщик** ауыр бомбардировщик **2.** *разг.* лётчик (*бомбаға тотоусы авиация осоусыһы*)

**БОМБАРДИ́РСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **бомбарди́р** 1 бомбардир(ҙар) ...ы; **бомбарди́рская ро́та** бомбардирҙар ротаһы

**БОМБЁЖКА** *ж*; *разг. см.* **бомби́ть**

**БОМБИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* бомбаға (тупҡа, утҡа) тотоу, бомба ташлау; **бомби́ть мост** күперҙе бомбаға тотоу

**БОМБОВО́З** *м см.* **бомбардиро́вщик**

**БО́МБОВЫЙ,** -ая, -ое бомба(лар) ...ы; **бо́мбовое вооруже́ние** бомба менән ҡоралланыу

**БОМБОДЕРЖА́ТЕЛЬ** *м*; *ав.* бомба эләктергес (*самолётта бомба төшөрөү өсөн*)

**БОМБОМЕТА́НИЕ** *с* бомба ташлау (ырғытыу); **тео́рия бомбомета́ния** бомба ташлау теорияһы

**БОМБОУБЕ́ЖИЩЕ** *с* бомбоубежище (*бомбанан һаҡланыу урыны*)

**БОНАПАРТИ́ЗМ** *м* бонапартизм (*сәйәси көрсөктән файҙаланып, ҡапма-ҡаршы тороусы көстәрҙең ике араһында йөрөп, диктатура тотоу формаһы*)

**БОНАПАРТИ́СТ** *м* бонапартист

**БОНАПАРТИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое бонапартизм, бонапартист(тар) ...ы

**БОНДА́РНЫЙ,** -ая, -ое мискә (сапсаҡ, көбө, батман, тәпән) яһау, ҡоршау ...ы; **бонда́рное произво́дство** мискә яһау, ҡоршау кәсебе

**БО́НДАРЬ** и **БОНДА́РЬ** *м* мискәсе (күнәксе, көбөсө, батмансы, тәпәнсе), мискә (сапсаҡ, көбө, батман, тәпән) яһаусы

**БО́НЗА** *м* (*буддийский священник, монах в странах Азии*) бонза

**БОНИТЕ́Т** *м*; *лес.* бонитет (*урмандың сифатына һәм продуктлылығына ҡарата махсус күрһәткес*); **бонитет ле́са** урман бонитеты

**БОНИТИРО́ВКА** *ж*; *с.-х.* бонитировка (*сифат яғынан баһалау*)

**БО́ННА** *ж* тәрбиәсе (*дворян ғаиләһендә балалар тәрбиәсеһе*)

**БО́НЫ I** *мн.* (*ед.* **бо́на** *ж*); *фин.* бона (*ваҡ аҡса урынына ваҡытлыса ҡулланылған кредит ҡағыҙы*)

**БО́НЫ II** *мн.* (*ед.* **бон** *м*) йөҙмә ҡойма (*ағас тотоу йәки караптарҙы үткәрмәү өсөн йөҙөп йөрөүсе кәртә*)

**БОР I** *м* ҡарағай урманы, ҡарағайлыҡ ♦ **с бо́ру да с со́сенки** осраҡлы рәүештә, унан-бынан, теләһә ҡайҙан; **сыр-бо́р разгоре́лся (загоре́лся, гори́т)** *из-за чего* ғауға ҡупты, ығы-зығы башланды

**БОР II** *м* бор (*химик элемент*)

**БОР III** *м* бор (*корос, алмас йәки карборонд баш беркетелгән стержень*)

**БОРА́** и **БО́РА** *ж* тау еле (*бейек ярҙан диңгеҙгә ҡарай иҫә торған һалҡын ел*)

**БО́РГЕС** *м*; *типогр.* боргес (*гәзит тексын йыйыуҙа ҡулланылған шрифт үлсәменең атамаһы*)

**БОРДО́ I** *с нескл.* бордо (*шарап төрө*)

**БОРДО́ II** *прил. неизм.* бурлат, ҡуйы ҡыҙыл, сейә көрән; **пла́тье цве́та бордо́** сейә көрән күлдәк; **шля́па бордо́** ҡуйы ҡыҙыл эшләпә

**БОРДО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **бордо́** II; **бордо́вая ко́фта** ҡуйы ҡыҙыл кофта

**БОРДЮ́Р** *м* **1.** ҡайма, әҙеп; **бордю́р к обо́ям** обой ҡаймаһы **2.** (*ограждение*) бордюр; **бордю́р вдоль тротуа́ра** тротуар бордюры

**БОРЕ́Ц I** *м* **1.** көрәшсе, көрәшеүсе; **борцы́ за мир** тыныслыҡ өсөн көрәшеүселәр **2.** *спорт.* көрәшсе; **борцы́ лёгкого ве́са** еңел ауырлыҡтағы көрәшселәр

**БОРЕ́Ц II** *м* мүктәк, айыутабан; *см.* **акони́т**

**БОРЗО́Й,** -ая -ое *ж* **1.** бурҙай; **борза́я су́ка** бурҙай кәнтәй; **борзо́й кобе́ль** бурҙай арлан **2.** *в знач. сущ.* **борза́я** *ж* бурҙай; **охо́та с борзы́ми** бурҙайҙар менән һунар

**БОРЗОПИ́СЕЦ** *м*; *ирон.* яҙыусы шәрәмәте (киҫәге, йораты)

**БО́РЗЫЙ,** -ая, -ое *уст.* етеҙ, йылғыр, йүгерек; **бо́рзый конь** йүгерек ат

**БОРЗЯ́ТНИК** *м* **1.** *охот.* һунар эттәрен ҡараусы **2.** *уст.* (*любитель охоты с борзыми*) бурҙай менән һунар иткән кеше

**БОРМАШИ́НА** *ж*; *спец.* бормашина

**БОРМОТА́НЬЕ** *с см.* **бормота́ть**

**БОРМОТА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* мығырлау, лығырлау, мығыр-мығыр килеү

**БОРМОТУ́Н** *м* и **БОРМОРТУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* мығырлаҡ, лығырлаҡ

**БО́РНЫЙ,** -ая, -ое бор ...ы; **бо́рная кислота́** бор кислотаһы

**БО́РОВ** *м* **1.** (*мн.* **бо́ровы**) бестерелгән сусҡа **2.** (*мн.* **бо́ровы**) *прост.* нәкәҫ (ауыр һөйәкле, төпөш) кеше **3.** (*мн.* **борова́**) юллыҡ, төтөн юллығы

**БОРОВИ́К** *м* аҡ бәшмәк, топош

**БОРОВИ́НКА** *ж* боровинка (*алма сорты*)

**БОРОВО́Й,** -ая, -ое ҡарағайлыҡ, ҡарағай урманы ...ы; **боровы́е места́** ҡарағайлыҡ (урын ер); **борова́я дичь** ҡарағай урманы кейектәре

**БОРОДА́** *ж* һаҡал; **дли́нная борода́** оҙон һаҡал; **окла́дистая борода́** көрәк һаҡал; **отпусти́ть бо́роду** һаҡал үҫтереү (ебәреү); **сбрить бо́роду** һаҡалды ҡырып ташлау

**БОРОДА́ВКА** *ж* сөйәл, һөйәл

**БОРОДА́ВЧАТЫЙ,** -ая, -ое сөйәлле, сөйәл менән ҡапланған

**БОРОДА́ТЫЙ,** -ая, -ое һаҡаллы, һаҡал үҫтергән; **борода́тый стари́к** һаҡаллы ҡарт

**БОРОДА́Ч** *м*; *разг.* һаҡаллы кеше, һаҡалбай, һаҡалтай

**БОРО́ДКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **борода́** **2.** (*выступ на конце ключа*) асҡыс теле (балтаһы); **боро́дка ключа́** асҡыс теле

**БОРОЗДА́** *ж* **1.** бураҙна; **глубо́кая борозда́** тәрән бураҙна; **проложи́ть пе́рвую борозду́** беренсе бураҙнаны һалыу **2.** *перен.* йыйырсыҡ, сырыш, һыр

**БОРОЗДИ́ТЬ** *несов. что* **1.** бураҙна ярыу (һалыу), бураҙналау; **борозди́ть зе́млю** ерҙе бураҙналау **2.** ярып үтеү (барыу), эҙ ҡалдырып үтеү (барыу); **корабли́ бороздя́т океа́н** караптар океанды ярып үтә **3.** (*пересекать*) йырғыслау, ярып үтеү, телгеләү; **мо́лнии борозди́ли не́бо** йәшен күк йөҙөн телгеләне

**БОРОЗДИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **борозди́ть**

**БОРО́ЗДКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **борозда́** **2.** йыйырсыҡ, ярыҡ; **боро́здка на лбу** маңлайҙағы йыйырсыҡ

**БОРОЗДОВО́Й,** -ая, -ое бураҙна ...ы, бураҙналап; **бороздово́й посе́в** бураҙналап сәсеү

**БОРО́ЗДЧАТЫЙ,** -ая, -ое бураҙналы, бураҙналанған; **боро́здчатое по́ле** бураҙналанған ялан

**БОРОНА́** *ж* тырма; **зубова́я борона́** тешле тырма; **ди́сковая борона́** дискылы тырма; **зу́бья бороны́** тырма тештәре; **рыхли́ть зе́млю бороно́й** ерҙе тырма менән йомшартыу

**БОРОНИ́ТЬ** *несов. что* тырматыу, тырмалау; **борони́ть по́ле** баҫыуҙы тырматыу

**БОРОНОВА́НИЕ** *с см.* **борони́ть**; **попере́чно-продо́льное боронова́ние** арҡыры-буй(ға) тырматыу

**БОРОНОВА́ТЬ** *несов. см.* **борони́ть**

**БОРО́ТЬ** *несов.* еңеү, еңеп сығыу; **сон бо́рет** йоҡо еңә

**БОРО́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем-чем* көрәшеү, алышыу; **боро́ться с чемпио́ном респу́блики** республика чемпионы менән көрәшеү; **боро́ться с враго́м** дошман менән алышыу **2.** *за что* көрәшеү, көс һалыу; **боро́ться за высо́кий урожа́й** ҙур уңыш өсөн көрәшеү; **боро́ться за ка́чество** сифат өсөн көрәшеү; **боро́ться за справедли́вость** хаҡлыҡ өсөн көрәшеү; **боро́ться за мир** тыныслыҡ өсөн көрәшеү **3.** *с чем*, *против чего* ҡаршы көрәшеү; **боро́ться про́тив пья́нства** эскелеккә ҡаршы көрәшеү; **боро́ться про́тив войны́** һуғышҡа ҡаршы көрәшеү

**БОРТ** *м* **1.** *в разн. знач.* борт; **ле́вый борт корабля́** караптың һул яҡ борты; **на борту́ самолёта** самолёт бортында; **отки́нуть борт автомоби́ля** автомобилдең бортын асыу **2.** (*левый или правый край одежды*) борт, ҡаушырма, ҡаптырма; **борт пальто́** пальто ҡаушырмаһы ♦ **борт о́ борт** йәнәш; **вы́кинуть за́ борт** *кого-что* сығарып ташлау; **оста́ться за борто́м** төшөп ҡалыу, кәрәкһеҙгә әйләнеү

**БОРТЕВО́Й,** -ая, -ое *уст.* солоҡ ...ы; **бортево́й топо́рик** солоҡ балтаһы



4*

**БОРТЖУРНА́Л** *м* бортжурнал, борт журналы

**БОРТИНЖЕНЕ́Р** *м* бортинженер, борт инженеры

**БОРТМЕХА́НИК** *м* бортмеханик, борт механигы

**БО́РТНИК** *м*; *уст.* солоҡсо; **изве́стный бо́ртник** билдәле солоҡсо

**БО́РТНИЧАТЬ** *несов.*; *уст.* солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеү (*ҡырағай бал ҡорттарынан бал алыу шөғөлө*)

**БО́РТНИЧЕСТВО** *с*; *уст.* солоҡсолоҡ; **занима́ться бо́ртничеством** солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеү

**БОРТО́ВКА** *ж*; *спец.* бортовка (*беше киндер туҡыма*)

**БОРТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** борт ...ы; **бортовы́е огни́** борт уттары; **бортово́й журна́л** борт журналы; **бортово́е обору́дование** борт ҡорамалдары **2.** иҙеүлек (*кейемдәге*); **бортова́я ткань** иҙеүлек туҡыма ♦ **бортова́я ка́чка** ян-яҡҡа сайҡалыу (*карапта*)

**БОРТОВЩИ́К** *м* бортовщик (*юл төҙөү эшсеһе*)

**БОРТПРОВОДНИ́К** *м* бортпроводник (*самолётта*); **бортпроводни́ца** *ж* бортпроводник ҡатын-ҡыҙ, стюардесса

**БОРТЬ** *ж*; *уст.* солоҡ, түмәр умарта; **ста́вить бо́рти** солоҡ ҡуйыу

**БОРЦО́ВКИ** *мн.* (*ед.* **борцо́вка** *ж*) борцовка (*көрәшселәр өсөн махсус аяҡ кейеме*); **наде́ть на́ ноги борцо́вки** аяҡҡа борцовка кейеү

**БОРЦО́ВСКИЙ,** -ая, -ое көрәшсе ...ы, көрәшселәр ...ы, көрәшсе(ләр)гә хас; **борцо́вская зака́лка** көрәшселәргә хас сыныҡҡанлыҡ; **борцо́вская сме́лость** көрәшсегә хас ҡыйыулыҡ

**БОРЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое көрәш ...ы, көрәшеү ...ы, көрәшеү өсөн тәғәйенләнгән; **борцо́вый зал** көрәш залы

**БО́РЩ** *м* борщ (*кәбеҫтә менән сөгөлдөр ашы*); **украи́нский борщ** украин борщы; **вари́ть борщ** борщ бешереү

**БОРЬБА́** *ж*; *в разн. знач.* көрәш, алыш; **во́льная борьба́** ирекле көрәш; **класси́ческая борьба́** классик көрәш; **кла́ссовая борьба́** синфи көрәш; **борьба́ за мир и справедли́вость** тыныслыҡ һәм ғәҙеллек өсөн көрәш; **национа́льно-освободи́тельная борьба́** милли-азатлыҡ көрәше; **борьба́ за повыше́ние ка́чества проду́кции** продукцияның сифатын күтәреү өсөн көрәш; **душе́вная борьба́** рухи көрәш

**БОСИКО́М** *нареч.*; *разг.* ялан аяҡ, яланғас аяҡ; **ходи́ть босико́м** ялан аяҡ йөрөү

**БОСНИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое босний ...ы, Босния ...ы; **босни́йский наро́д** Босния халҡы

**БОСНИ́ЙЦЫ** *мн.* боснийҙар, босний халҡы // *ед.* **босни́ец** *м* босний ир-аты; **босни́йка** *ж* босний ҡатын-ҡыҙы

**БОСО́Й,** -ая, -ое ялан аяҡ, ялан аяҡлы; **боса́я де́вочка** ялан аяҡлы ҡыҙыҡай ♦ **на бо́су но́гу** ҡуңалтаҡ, ялан аяҡ

**БОСОНО́ГИЙ,** -ая, -ое *см.* **босо́й**; **босоно́гие мальчи́шки** ялан аяҡлы малайҙар

**БОСОНО́ЖКА** *ж* **1.** ялан аяҡлы ҡатын-ҡыҙ **2.** *обычно мн.* **босоно́жки** босоножка (*йәйге еңел аяҡ кейеме*); **ко́жаные босоно́жки** күн босоножка; **наде́ть босоно́жки** босоножка кейеү

**БОСС** *м* босс (**1.** *предприятие йәки учреждениеның хужаһы, етәксеһе* **2.** *АҠШ-та фирҡә йәки профсоюз ойошмаһы етәксеһе*)

**БОСТО́Н** *м* **1.** (*высококачественная шерстяная ткань*) бостон, бостондан; **чёрный босто́н** ҡара бостон; **костю́м из босто́на** бостондан тегелгән костюм **2.** (*род карточной игры*) бостон; **игра́ть в босто́н** бостон уйнау **3.** (*парный танец*) бостон; **танцева́ть босто́н** бостон бейеү

**БОСТО́НОВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*сделанный из бостона*) бостон, бостондан тегелгән; **босто́новый костю́м** бостон костюм

**БОСЯ́К** *м* (*оборванец*) һуҡбай, йолҡош, берәҙәк

**БОСЯ́ЦКИЙ,** -ая, -ое һуҡбай(ҙар) ...ы, йолҡош(тар) ...ы, берәҙәк(тәр) ...ы; **босяцкая жизнь** һуҡбайҙар тормошо

**БОСЯ́ЧЕСТВО** *с* **1.** һуҡбайлыҡ, йолҡошлоҡ, берәҙәклек **2.** *собир.* һуҡбайҙар, йолҡоштар, берәҙәктәр

**БОТ I** *м* бот (*ҙур булмаған судно*); **мото́рный бот** моторлы бот; **па́русный бот** елкәнле бот; **гребно́й бот** ишкәкле бот

**БОТ II** *м см.* **бо́ты**

**БО́ТАЛО** *с*; *рыб.* дөмбөр, гөмбөр; **загоня́ть ры́бу бо́талом** дөмбөр менән балыҡ ҡыуыу

**БОТА́НИК** *м* ботаник, ботаника белгесе

**БОТА́НИКА** *ж* ботаника; **уче́бник бота́ники** ботаника дәреслеге; **уро́к бота́ники** ботаника дәресе; **изуча́ть бота́нику** ботаниканы өйрәнеү

**БОТАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ботаника ...ы; **ботани́ческий сад** ботаника баҡсаһы

**БО́ТАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *рыб.* дөмбөр менән ҡыуыу (*балыҡты*)

**БОТВА́** *ж* һабаҡ, һабаҡ-япраҡ; **ботва́ карто́феля** картуф (бәрәңге) һабағы

**БОТВИ́НЬЯ** *ж* ботвинья (*кеҙәҫ, бешкән йәшелсә һәм балыҡтан әҙерләнгән һалҡын аш*)

**БО́ТИК I** *м*; *уменьш. от* **бот** I

**БО́ТИК II** *м см.* **бо́тики**

**БО́ТИКИ** *мн.* (*ед.* **бо́тик** *м*) *см.* **бо́ты**

**БОТИ́НКИ** *мн.* (*ед.* **боти́нок** *м*) ботинка; **ко́жаные боти́нки** күн ботинка; **мужски́е боти́нки** ирҙәр ботинкаһы; **наде́ть боти́нки** ботинка кейеү; **снять боти́нки** ботинканы сисеү (һалыу)

**БОТУЛИ́ЗМ** *м* ботулизм (*аҙыҡ менән ағыуланыу*)

**БОТФО́РТЫ** *мн.* (*ед.* **ботфо́рт** *м*) ботфорт (*оҙон һәм киң ҡуныслы күтәрмәле итек*); **лаки-**

**ро́ванные высо́кие ботфо́рты** лаклы оҙон ботфорт; **наде́ть ботфо́рты** ботфорт кейеү

**БО́ТЫ** *мн.* (*ед.* **бот** *м*) бутый (*аяҡ кейеме*); **рези́новые бо́ты** резина бутый; **суко́нные бо́ты** тула бутый; **де́тские бо́ты** балалар бутыйы; **наде́ть бо́ты** бутый кейеү

**БО́ЦМАН** *м* боцман (*карапта хужалыҡ эштәре алып барыусы кесе командир*)

**БО́ЦМАНСКИЙ,** -ая, -ое боцман ...ы; **бо́цманский свисто́к** боцман һыҙғыртҡысы

**БОЧА́Р** *м см.* **бо́ндарь**

**БОЧА́РНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **бонда́рный**

**БОЧА́РНЯ** *ж* мискә ҡоршау оҫтаханаһы

**БО́ЧЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мискә ...ы, сапсаҡ ...ы; **бо́чечный о́бруч** мискә ҡоршауы **2.** (*содержимый в бочках*) мискәле; **бо́чечное пи́во** мискәле һыра; **бо́чечное ма́сло** мискәле май

**БО́ЧКА** *ж* **1.** мискә, сапсаҡ; **деревя́нная бо́чка** ағас мискә; **водово́зная бо́чка** һыу ташый торған мискә; **напо́лнить бо́чку водо́й** мискәне һыу менән тултырыу; **бо́чка кероси́на** бер мискә кәрәсин **2.** *ав.* бочка (*юғары пилотаж фигураларының береһе*) ♦ **бездо́нная бо́чка**: 1) араҡы мискәһе, эскесе; 2) төпһөҙ мискә, убыр; **как се́льди в бо́чке** шығырым тулы, энә төртөр урын юҡ

**БО́ЧКОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **бо́чечный**

**БОЧО́НОК** *м* бәләкәй мискә (сапсаҡ); **бочо́нок с водо́й** һыулы бәләкәй мискә

**БОЯЗЛИ́ВОСТЬ** *ж* ҡурҡаҡлыҡ, өркәклек, ҡурҡаҡ (өркәк) булыу; **боязли́вость ребёнка** баланың ҡурҡаҡлығы

**БОЯЗЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡурҡаҡ, ҡурҡыусан, өркәк, өркөүсән; **боязли́вый зверёк** өркәк йәнлек **2.** ҡыйыуһыҙ, баҙнатһыҙ; **боязли́вый взгляд** ҡыйыуһыҙ ҡараш

**БО́ЯЗНО** *в знач. сказ., безл.*; *прост.* ҡурҡыныс, ҡурҡыу; **мне бо́язно** мин ҡурҡам; **но́чью в лесу́ бо́язно** төнөн урманда ҡурҡыныс

**БОЯ́ЗНЬ** *ж* ҡурҡыу, өркөү, шөрләү; **боя́знь одино́чества** яңғыҙлыҡтан ҡурҡыу; **боя́знь ста́рости** ҡартлыҡтан ҡурҡыу

**БОЯ́РИН** *м*; *ист.* баяр

**БОЯ́РСКИЙ,** -ая, -ое; *ист.* баяр(ҙар) ...ы; **Боя́рская ду́ма** Баярҙар думаһы; **боя́рские зе́мли** баяр ерҙәре

**БОЯ́РСТВО** *с собир.*; *ист.* баярҙар; **моско́вское боя́рство** Мәскәү баярҙары

**БОЯ́РЫНЯ** *ж*; *ист.* баяр ҡатыны

**БОЯ́РЫШНИК** *м* энәлек, еҙәй, ҡамыраш, дунала; **куст боя́рышника** энәлек ҡыуағы

**БОЯ́РЫШНИЦА** *ж* энәлек (дунала, еҙәй) күбәләге

**БОЯ́РЫШНЯ** *ж*; *ист.* баяр ҡыҙы

**БОЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡурҡыу, шөрләү, өркөү; **боя́ться волко́в** бүренән ҡурҡыу; **боя́ться темноты́** ҡараңғынан ҡурҡыу; **боя́ться простуди́ться** һыуыҡ тейеүҙән ҡурҡыу **2.** (*опасаться чего-л., беспокоиться, тревожиться*) борсолоу, тынысһыҙланыу, хафаланыу; **боя́ться за дете́й** балалар өсөн борсолоу **3.** *чего* (*портиться от чего-л., не переносить чего-л.*) сыҙамау, түҙмәү, боҙолоу, оҡшатмау, яратмау; **расте́ния боя́тся темноты́** үҫемлектәр ҡараңғыны яратмай; **фане́рные изде́лия боя́тся сы́рости** фанерҙан яһалған әйберҙәр еүешкә сыҙамай ♦ **бою́сь сказа́ть (назва́ть)** белмәйем, әйтә алмайым

**БРА** *с нескл.* бра, стена шәмдәле; **хруста́льное бра** гәлсәр бра

**БРАВА́ДА** *ж* яһалма ҡыйыулыҡ, кәпәренеү, осоноу, маҡтаныу, маһайыу

**БРАВИ́РОВАНИЕ** *с см.* **брави́ровать**

**БРАВИ́РОВАТЬ** *несов. чем* и *без доп.* осоноу, кәпәренеү, маһайыу, ҡыйыу (шәп) булып ҡыланыу; **брави́ровать свои́ми успе́хами** үҙеңдең уңыштарың менән маһайыу

**БРАВИ́ССИМО** *межд. см.* **бра́во**

**БРА́ВО** *межд.* афарин, йәшә, шәп (*оҫта башҡарыусы артистарҙы маҡтау һүҙе*)

**БРАВУ́РНОСТЬ** *ж* дәрт, күңел күтәренкелеге, күтәренке кәйеф

**БРАВУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дәртләндерә торған, дәртле, йәнле, күңелде (кәйефте) күтәрә торған, күтәренке; **браву́рный марш** дәртле марш **2.** (юғары) оҫталыҡ талап иткән, ҡатмарлы; **браву́рная а́рия** оҫталыҡ талап иткән ария

**БРА́ВЫЙ,** -ая, -ое ғәййәр, (күрер күҙгә) егеттәр һымаҡ, булдыҡлы, йылғыр; **бра́вый мо́лодец** ғәййәр егет; **бра́вый солда́т** йылғыр һалдат

**БРА́ГА** *ж* бал (*балдан йәки шәкәрҙән әсетелгән иҫерткес эсемлек*); **медо́вая бра́га** бал балы; **свари́ть бра́гу** бал ҡойоу

**БРАДОБРЕ́Й** *м*; *уст.* сәс алыусы, парикмахер

**БРА́ЖКА** *ж*; *ласк. от* **бра́га**

**БРА́ЖНИК** *м*; *уст.* эскесе, иҫерекбаш, сәрхуш

**БРА́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *уст.* эскелеккә (эскегә) һалышыу, эсеп йөрөү, эсеү

**БРА́ЖНИЧЕСТВО** *с*; *уст.* эске мәжлестәре, эскелек

**БРАЗДА́** *ж*; *трад.-поэт.* бураҙна

**БРАЗДЫ́** *мн. нескл.*; *книжн., уст.* ауыҙлыҡ, йүгән ♦ **бразды́ правле́ния** *высок.* идара итеү, власть башында тороу

**БРАЗИ́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое бразил ...ы, Бразилия ...ы; **брази́льский ко́фе** Бразилия ҡәһүәһе

**БРАЗИ́ЛЬЦЫ** *мн.* бразилиялылар, бразил халҡы // *ед.* **брази́лец** *м* бразил ир-аты; **бразилья́нка** *ж* бразил ҡатын-ҡыҙы

**БРАК I** *м* никах, өйләнешеү; **вступи́ть в брак** никахҡа инеү, өйләнеү (*о мужчине*); тормошҡа (иргә) сығыу (*о женщине*); **состоя́ть в бра́ке** никахта тороу; **расто́ргнуть брак** айырылышыу; **свиде́тельство о бра́ке** никах тураһында таныҡлыҡ, никах ҡағыҙы

**БРАК II** *м* брак, етешһеҙлек, кәмселек; (эшкә) яраҡһыҙ, түбән сифатлы булыу, (боҙоҡ) яраҡһыҙ булыу; **чуло́к с бра́ком** етешһеҙлеге булған ойоҡ

**БРАКЁР** *м* бракер (*тауарҙың сифатын билдәләүсе*)

**БРАКЕРА́Ж** *м* бракераж (*тауарҙың сифатын һәм заказ шарттарына яуап биреүен билдәләү*)

**БРАКОВА́НИЕ** *с см.* **бракова́ть**

**БРАКО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **бракова́ть**; **брако́ванные изде́лия** бракка сығарылған изделиелар **2.** *прил.* браклы, боҙоҡ, яраҡһыҙ, кәмселекле, эшкинмәгән; **брако́ванные часы́** браклы сәғәт

**БРАКОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* бракка (яраҡһыҙға) сығарыу, боҙоҡ (яраҡһыҙ) тип табыу; **бракова́ть нару́чные часы́** ҡул сәғәтен яраҡһыҙ тип табыу **2.** (*отвергать*) насар тип табыу, кире ҡағыу; **бракова́ть сбо́рник стихо́в** шиғырҙар йыйынтығын кире ҡағыу; **бракова́ть диссерта́цию** диссертацияны насар тип табыу **3.** (*определять сорт по качеству*) сифатын билдәләү, сортҡа айырыу; **бракова́ть гото́вые изде́лия** изделиеларҙы сортҡа айырыу

**БРАКОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **бракова́ть**

**БРАКО́ВКА** *ж см.* **бракова́ть**

**БРАКО́ВЩИК** *м* и **БРАКО́ВЩИЦА** *ж* бракка сығарыусы, браклаусы

**БРАКОДЕ́Л** *м* брак яһаусы (эшләүсе)

**БРАКОНЬЕ́Р** *м* браконьер (*һунарсылыҡ, балыҡ тотоу ҡағиҙәләрен боҙған кеше*)

**БРАКОНЬЕ́РСТВО** *с* браконьерлыҡ; **боро́ться про́тив браконье́рства** браконьерлыҡҡа ҡаршы көрәшеү

**БРАКОРАЗВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое айырылышыу ...ы; **бракоразво́дный проце́сс** айырылышыу процесы

**БРАКОСОЧЕТА́ВШИЙСЯ,** -аяся *офиц.* **1.** (*новобрачный*) яңы өйләнгән (никахлашҡан) **2.** *в знач. сущ.* **бракосочета́вшийся** *м* никахлашҡан егет; **бракосочета́вшаяся** *ж* никахҡа ингән ҡыҙ

**БРАКОСОЧЕТА́НИЕ** *с*; *офиц.* никах, никахлашыу; **Дворе́ц бракосочета́ний** Никах һарайы

**БРАМА́Н** и **БРАМИ́Н** *м*; *уст. см.* **брахма́н**

**БРАМАНИ́ЗМ** *м см.* **брахмани́зм**

**БРА́МСЕЛЬ** *м*; *мор.* брамсель (*иң өҫкө парус*)

**БРАНДВА́ХТА** *ж*; *мор.* брандвахта (*порттағы һаҡсы судно*)

**БРА́НДЕР** *м*; *мор.* брандер (**1.** *дошман караптарын яндырыу өсөн шартлатҡыс матдә тейәлгән судно* **2.** *бухта йәки гавань алдында юлды ябыу өсөн батырыла торған судно*)

**БРАНДМАЙО́Р** *м*; *уст.* брандмайор (*ҡаланың янғын һүндереү командаһы башлығы*)

**БРАНДМА́УЭР** *м* брандмауэр (*ике бина араһына һалынған утҡа сыҙамлы стена*)

**БРАНДМЕ́ЙСТЕР** *м*; *уст.* брандмейстер (*янғын һүндереү командаһы башлығы*)

**БРАНДСПО́ЙТ** *м* брандспойт (**1.** *янғын һүндереү насосы эсәгененең башы* **2.** *янғын һүндереү нососы*)

**БРАНИ́ТЬ** *несов. кого-что* әрләү, орошоу, тиргәү, шелтәләү; **брани́ть ма́льчика за ша́лости** шуҡлыҡтары өсөн малайҙы орошоу

**БРАНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем-чем* (*ссориться*) һүҙгә килешеү, ирешеү, тиргәшеү, ыҙғышыу, әрләшеү; **мы никогда́ не брани́лись с сосе́дями** күршеләр менән һис ҡасан да һүҙгә килешкәнебеҙ булманы **2.** (*ругаться*) һүгенеү, тиргәшеү; **стари́к брани́лся** ҡарт тиргәшә ине

**БРА́ННЫЙ I,** -ая, -ое (*ругательный*) тиргәү ...ы, һүгенеү ...ы, оятһыҙ; **бра́нные слова́** һүгенеү һүҙҙәре; **бра́нные выраже́ния** оятһыҙ һүҙҙәр

**БРА́ННЫЙ II,** -ая, -ое *высок.* хәрби, һуғыш ...ы; **бра́нное по́ле** һуғыш майҙаны (ҡыры, яланы); **бра́нная сла́ва** хәрби дан

**БРАНЬ I** *ж* һүгенеү, оятһыҙ (алама) һүҙҙәр, һүгенеү һүҙҙәре

**БРАНЬ II** *ж*; *высок.* һуғыш, көрәш ♦ **на по́ле бра́ни** һуғыш яланында

**БРАСЛЕ́Т** *м* беләҙек; **серебряный брасле́т** көмөш беләҙек; **янта́рный брасле́т** гәрәбә беләҙек; **носи́ть брасле́т** беләҙек кейеү (йөрөтөү)

**БРАСС** *м*; *спорт.* брасс (*йөҙөүҙең махсус бер стиле*)

**БРАТ** *м* **1.** ағай, ир туған, эне, ҡусты; **ста́рший брат** ағай; **мла́дший брат** эне, ҡусты; **двоюро́дный брат** ике туған ағай; **троюро́дный брат** өс туған ағай; **моло́чный брат** имсәктәш ағай (ҡусты); **сво́дный брат** үгәй туған **2.** (*при обращении*) туған; **ты, брат, со мной не шути́** һин, туған, минең менән шаярма **3.** (*единомышленник*) фекерҙәш, теләктәш; **мы — бра́тья по убежде́ниям** беҙ — фекерҙәштәрбеҙ ♦ **ваш брат** һеҙҙең кеше(ләр), һеҙҙең халыҡ; **наш брат** беҙҙең кеше(ләр), беҙҙең халыҡ; **на бра́та** кеше (әҙәм) башына; **свой брат** үҙ кеше

**БРАТА́НИЕ** *с см.* **брата́ться**

**БРАТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*вступать в дружеские отношения*) туғанлашыу, дуҫлашыу **2.** (*прекращать военные действия*) татыулашыу, килешеү, ярашыу

**БРА́ТЕЦ** *м*; *ласк. от* **брат** 1, 2

**БРА́ТИК** *м*; *ласк. от* **брат** 1

**БРА́ТИНА** *ж* ҙур туҫтаҡ (*элек ашау, эсеү өсөн ҡулланылған*)

**БРАТИ́ШКА** *м*; *разг.* **1.** *уничиж.* и *ласк. от* **брат** 1; **2.** (*маленький брат*) ҡусты, эне, мырҙа

**БРА́ТИЯ** *ж собир.* **1.** (*монашеская община*) бер монастырға ҡараған монахтар, бер монастырь монахтары **2.** *шутл.* (*люди одной профессии*) халҡы; **актёрская бра́тия** артистар халҡы; **пи́шущая бра́тия** яҙыусылар халҡы

**БРАТО́К** *м*; *прост.*, *уничиж.* и *ласк. от* **брат** 1, 2 (*обычно в обращении*) туғанҡай, ҡусты кеше, энекәш

**БРАТОУБИ́ЙСТВЕННЫЙ: братоуби́йственная война́** туған-ара үлтерешеү һуғышы

**БРАТОУБИ́ЙСТВО** *с* туған-ара үлтерешеү

**БРАТОУБИ́ЙЦА** *м* и *ж* туғанын үлтереүсе

**БРА́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*родственный*) туғанлыҡ ...ы, ҡәрҙәшлек ...ы; **бра́тские чу́вства** туғанлыҡ хистәре **2.** (*близкий по духу*) туғандаш; **бра́тские респу́блики** туғандаш республикалар ♦ **бра́тская моги́ла**; **бра́тское кла́дбище** туғандар ҡәберлеге

**БРА́ТСТВО** *с* **1.** *высок.* дуҫлыҡ, туғанлыҡ, берҙәмлек; **бра́тство наро́дов** халыҡтар берҙәмлеге **2.** *уст.* дини йәмғиәт

**БРАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* алыу; **брать кни́гу со стола́** өҫтәлдән китап алыу; **брать лопа́ту** көрәк алыу **2.** *перен.* алыу; **брать те́му для диссерта́ции** диссертация өсөн тема алыу; **брать уро́ки** дәрес алыу **3.** *без доп.* (*клевать — о рыбе*) ҡабыу, сиртеү; **на у́дочку ры́ба берёт хорошо́** ҡармаҡҡа балыҡ яҡшы ҡаба **4.** (*собирать*) йыйыу, тиреү; **брать сморо́дину** ҡарағат тиреү **5.** *кого-что* (*уносить с собой*) алыу; **брать в доро́гу чемода́н** юлға сумаҙан алыу; **брать с собо́й дете́й** үҙең менән бергә балаларҙы алыу; **брать рабо́ту на́ дом** өйгә эш алыу **6.** *чем* (*добиваться*) алдырыу, ирешеү; **он берёт не си́лой, а ло́вкостью** ул көс менән түгел, ә таһыллыҡ менән алдыра; **он берёт умо́м** ул аҡыл менән алдыра **7.** (*получать в своё обладание*, *пользование*, *распоряжение*) алыу; **брать зе́млю в аре́нду** ерҙе ҡуртымға алыу; **брать де́ньги в долг** аҡсаны бурысҡа алыу; **брать маши́ну напрока́т** машинаны ҡуртымға алыу **8.** (*нанимать*) яллау; **брать такси́** такси яллау; **брать ня́ню** бала ҡараусы яллау **9.** (*снимать*) ваҡытлыса алыу, алып тороу; **брать кварти́ру** фатир алып тороу **10.** (*покупать*, *приобретать*) һатып алыу; **брать биле́ты в теа́тр** театрға билеттар алыу **11.** (*держаться какого-л. направления пути*) тотоу, юл тотоу, алыу; **бери́ вле́во** һулға тот; **брать вы́ше** юғарыраҡ алыу **12.** *охот.* (*ловить*, *травить*) эләктереп (тибеп) алыу, тотоу; **я́стреб берёт ди́ких гусе́й** ҡарсыға ҡырағай өйрәктәрҙе тибеп ала; **соба́ки не бра́ли кабано́в** эттәр ҡабандарҙы тотманы **13.** *без доп.* (*достигать*, *попадать — об оружии*) тейҙереү, алдырыу, алыу; **винто́вка берёт на три́ста ме́тров** винтовка өс йөҙ метрҙы алдыра ♦ **брать быка́ за рога́** туранан-тура төп эшкә күсеү, үгеҙҙе мөгөҙөнән алыу; **брать высоту́** юғарыға күтәрелеү; **брать (взять) верх** еңеү, өҫтөнлөк алыу, өҫкә сығыу; **брать (взять) в оборо́т** *кого* ҡыҫымға алыу, яғаһына йәбешеү, яғаһынан алыу, арт һабағын уҡытыу; **брать курс (направле́ние)** юл тотоу, йүнәлеш алыу; **брать за го́рло** яғаһынан (боғаҙынан) алыу, боғаҙға йәбешеү; **брать (взять) в ру́ки** *кого* ҡулға алыу; **брать (взять) в (свои́) ру́ки** *что* етәкселекте (идараны) үҙ ҡулыңа алыу; **брать за́ душу (за́ сердце)** йөрәккә үтеү, йөрәктән алыу, йөрәккә төшөү; **брать (взять) на букси́р** *кого-что* артҡа ҡалғанға ярҙам итеү, буксирға алыу; **брать (взять) на пу́шку** *кого*; *прост.* алдыҡ юл менән теләккә, маҡсатҡа ирешеү; **брать (взять) на себя́** *что* үҙ өҫтөнә алыу; **брать (взять) под (своё) кры́лышко** *кого* үҙ (ҡарамағыңа) хәстәреңә алыу, ҡанат аҫтына алыу; **брать (взять) приме́р** *с кого* үрнәк (өлгө) алыу; **брать (взять) своё** үҙеңдекен итеү, маҡсатҡа ирешеү; **брать (взять) (свои́) слова́ обра́тно (наза́д)** һүҙҙән кире ҡайтыу, һүҙҙе кире алыу; **брать (взять) себя́ в ру́ки** үҙеңде ҡулға алыу **брать (взять) сло́во**: 1) һүҙ алыу (*йыйылышта һөйләү өсөн*); 2) һүҙ (вәғәҙә) алыу (*кемдән*); **брать (взять) с потолка́** *что* һауанан алып һөйләү, үҙең уйлап сығарыу, яһап һөйләү; **брать (взять) сто́рону** *кого*, *чью кемдеңдер* фекеренә ҡушылыу, яҡлы булып китеү; **брать по́д руку** ҡултыҡлап алыу; **брать нача́ло** башланыу, башланып китеү; **брать прице́л** төбәү, тоҫҡау; **жизнь берёт своё** тормош үҙенекен итә; **тоска́ берёт** эс боша; **меня́ берёт сомне́ние** мин икеләнәм (шикләнәм)

**БРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *за кого-что* тотоноу; **бра́ться за ру́чку две́ри** ишек тотҡаһына тотоноу; **бра́ться за пери́ла ле́стницы** баҫҡыс яндауырына тотоноу **2.** *за что* (*приниматься*) башлау, керешеү, тотоноу; **бра́ться за рабо́ту** эшләргә (эшкә) тотоноу; **бра́ться за кни́гу** уҡырға (китапҡа) тотоноу; **бра́ться за перо́** яҙа башлау, яҙырға тотоноу **3.** (*появляться*, *возникать*) килеү, барлыҡҡа килеү, хасил булыу; **отку́да тако́й голосо́к берётся?** ҡайҙан бындай тауыш хасил була?; **отку́да беру́тся у него́ таки́е де́ньги?** ҡайҙан килә уға шул тиклем аҡса? **4.** *страд. от* **брать** ♦ **бра́ться за ум** аҡылға ултырыу

**БРА́УНИНГ** *м* браунинг (*автоматик пистолет*)

**БРАХМА́Н** *м* брахман (*Һиндостанда юғары каста кешеһе*; *башта жрецтар кастаһына ҡараған*)

**БРАХМАНИ́ЗМ** и *уст.* **БРАМАНИ́ЗМ** *м* брахманизм (*һиндтарҙың беҙҙең эраға тиклем IX—VIII бб. барлыҡҡа килгән дине*)

**БРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** никах ...ы, өйләнешеү ...ы; **бра́чное свиде́тельство** никах таныҡлығы **2.** (*относящийся к периоду спаривания животных*) ҡушылыу ...ы, ҡарығыу ...ы; **бра́чный пери́од** ҡарығыу осоро

**БРА́ШПИЛЬ** *м*; *мор.* брашпиль (*караптарҙа якорҙы күтәрә торған сығыр*)

**БРЕВЕ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое бүрәнәнән төҙөлгән, бүрәнә; **бреве́нчатый дом** бүрәнә йорт

**БРЕВНО́** *с* **1.** бүрәнә; **сосно́вое бревно́** ҡарағай бүрәнә; **вози́ть брёвна** бүрәнә ташыу **2.** *пренебр.* (*о тупом, глупом человеке*) күҙле бүкән, түңгәк **3.** *спорт.* (*брус на стойках для упражнений в равновесии*) бүрәнә; **упражне́ния на бревне́** бүрәнә өҫтөндә(ге) күнекмәләр

**БРЕД** *м* **1.** һаташыу, һаташып һөйләнеү; **больно́й в бреду́** ауырыу һаташа **2.** *разг.* (*о чём-л. несуразном, бессмысленном*) мәғәнәһеҙлек, туҙға яҙмаған һүҙ; **рассужде́ния его́ — бред** уның улай һөйләүе — мәғәнәһеҙлек

**БРЕ́ДЕНЬ** *м* йылым; **лови́ть ры́бу бре́днем** балыкты йылым менән тотоу

**БРЕ́ДИТЬ** *несов.* **1.** һаташыу, һаташып һөйләнеү; **бре́дить в беспа́мятстве** аңһыҙ хәлдә һаташыу **2.** *кем-чем*; *перен.* һаташыу, хыялланыу, ныҡ мауығыу; **бре́дить му́зыкой** музыка менән мауығыу; **бре́дить теа́тром** театр менән һаташыу

**БРЕ́ДИТЬСЯ** *несов. безл.* (*мерещиться*) күргән (белгән) шикелле тойолоу, күҙалланыу, һаташыу

**БРЕ́ДНИ** *мн.*; *разг.*, *пренебр.* юҡ-бар (туҙға яҙмаған) һүҙ, буш уй (һүҙ, хыял), уйҙырма, сафсата, һаташыу; **пусты́е бре́дни** буш хыял; **ста́рческие бре́дни** ҡартлыҡ һаташыуы

**БРЕДО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаташыу ...ы; **бредо́вое состоя́ние** һаташыу хәле **2.** (*нелепый, фантастический*) аҡылға һыймаған, туҙға яҙмаған, хыялый; **бредо́вый план** хыялый план

**БРЕ́ЗГАТЬ** и **БРЕ́ЗГОВАТЬ** *несов.* ерәнеү, сирҡаныу, сикәнеү, ытырғаныу; **он ни́чем не бре́згует** ул бер нәмәнән дә сикәнмәй; **бре́згать пить из чужо́го стака́на** кеше стаканынан эсергә ерәнеү

**БРЕЗГЛИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** ерәнеү, сирҡаныс, сикәнеүсәнлек; **показа́ть брезгли́вость** ерәнеүҙе күрһәтеү **2.** (*чувство отвращения*) күңел (тән) тартмау, ытырғаныу тойғоһо

**БРЕЗГЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ерәнсек, сикәнсек сирҡансыҡ; **брезгли́вый челове́к** ерәнгән кеше **2.** (*выражающий отвращение*) ытырғаныу тойғоһо уятҡан, ытырғаныслы; **брезгли́вый взгляд** ытырғаныслы ҡараш

**БРЕ́ЗГОВАТЬ** *несов. см.* **бре́згать**

**БРЕЗЕ́НТ** *м* брезент; **зелёный брезе́нт** йәшел брезент

**БРЕЗЕ́НТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** брезент ...ы; **брезе́нтовое произво́дство** брезент етештереү **2.** брезент, брезенттан эшләнгән; **брезе́нтовый плащ** брезент плащ

**БРЕ́ЗЖИТЬ** *несов.* **1.** (*слабо светиться*) йылтырап (емелдәп) күренеү, емелдәү, ем-ем итеү; **в степи́ бре́зжит огонёк** яланда ут емелдәп күренә **2.** *безл.* (*светать*) таң беленеү (һыҙылыу), яҡтыра башлау, яҡтырып килеү; **чуть бре́зжит** таң яҡтырып килә

**БРЕ́ЗЖИТЬСЯ** *несов. см.* **бре́зжить**

**БРЕЛО́К** *м* брелок, сылтыраҡ (*кеҫә сәғәтенә, беләҙеккә һ.б. тағыла торған биҙәүес*)

**БРЕ́МЯ** *с* **1.** ауырлыҡ, йөк **2.** *обычно чего* или *какое*; *перен.* ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ, имгәк, ғазап; **взять на себя́ непоси́льное бре́мя** үҙеңә көс еткеһеҙ ауырлыҡ алыу ♦ **разреши́ться от бре́мени** *уст.* бәпесләү, бала табыу, бушаныу

**БРЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* фани, серей (бөтә) торған; **бре́нный мир** фани донъя

**БРЕНЧА́НИЕ** *с см.* **бренча́ть**

**БРЕНЧА́ТЬ** *несов.* **1.** (*звенеть, звякать*) сылтырау, шылтырау, сылтыратыу, сыңлау, шылтыратыу, сылтыр-сылтыр итеү (килеү); **стака́ны бренча́т** стакандар сылтырай; **моне́ты бренча́т в карма́не** кеҫәлә тәңкәләр сылтыр-сылтыр килә; **бренча́ть ключа́ми** асҡыстарҙы сылтыратыу **2.** *на чём*; *разг.* (*неискусно играть на чём-л.*) дыңғырлатыу; **бренча́ть на балала́йке** балалайка дыңғырлатыу

**БРЕСТИ́** *несов.* әкрен генә (һөйрәлеп кенә) атлау, көс-хәл менән генә атлап барыу (килеү); **брести́ по гря́зи** батҡаҡтан көс-хәл менән генә атлап барыу

**БРЕТЕ́ЛИ** *мн.* (*ед.* **брете́ль** *ж*) бретель, бау (*күлдәкте, лифчикты һ.б. тотоп тороу өсөн ҡулбаш аша уткәреп тегелгән таҫма*); **брете́ли соро́чки** эске күлдәк бауы

**БРЕТЁР** *м*; *уст.* бретёр, сәкәләй, бәйләнсек (*яньял, һуғыш, талаш сығарырға әүәҫ кеше*)

**БРЁХ** *м* **1.** *прост.* (*собачий лай*) эт өрөүе **2.** *груб.*, *прост.*, *пренебр. см.* **брехня́**

**БРЕХА́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** (*лаять*) өрөү, ләңкелдәү; **соба́ки бре́шут** эттәр өрә **2.** (*врать, говорить вздор*) ялғанлау, алдау

**БРЕХНЯ́** *ж*; *прост.*, *пренебр.* ялған, алдыҡ, буш һүҙ, сафсата, уйҙырма

**БРЕХУ́Н** *м* и **БРЕХУ́НЬЯ** *ж*; *прост.*, *пренебр.* ялғансы, алдаҡсы

**БРЕШЬ** *ж* **1.** (*пролом*) тишек, емерек урын (*стенала, карап ҡабырғаһында һ.б.*); **брешь от снаря́да** туп тишкән урын **2.** *перен.* өҙөк (өҙөлгән) урын; **брешь в оборо́не** обороналағы өҙөк урын **3.** *перен.* (*недостача, ущерб*) етмәү, кәм сығыу, өҫкә сығыу; **брешь в бюдже́те** бюджетта етмәү ♦ **проби́ть брешь** зыян килтереү

**БРЕ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее *прич. от* **брить** ♦ **бре́ющий полёт** түбән (аҫтан, ҡыйып) осоу (*самолёт*)

**БРИГ** *м*; *мор.* бриг (*ике мачталы елкәнле судно*)

**БРИГА́ДА** *ж*; *в разн. знач.* бригада; **та́нковая брига́да** танк бригадаһы; **тра́кторная брига́да** тракторсылар бригадаһы; **огоро́дная брига́да** йәшелсәселәр бригадаһы; **поездна́я брига́да** поезд бригадаһы

**БРИГАДИ́Р I** *м* бригадир; **бригади́р полево́дческий брига́ды** баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры; **бригади́р слесаре́й** слесарҙар бригадиры

**БРИГАДИ́Р II** *м*; *ист.* бригадир; **Салава́т — бригади́р Пугачёва** Салауат — Пугачёвтың бригадиры

**БРИГАДИ́РСКИЙ I,** -ая, -ое бригадир(ҙар) ...ы; **бригади́рские обя́занности** бригадирҙың бурыстары

**БРИГАДИ́РСКИЙ II,** -ая, -ое бригадир(ҙар) ...ы; **бригади́рский чин** бригадир чины

**БРИГАДИ́РСТВО** *с* бригадирлыҡ; **вести́ бригади́рство** бригадирлыҡты алып барыу

**БРИГАДИ́РСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг.* бригадир булып эшләү, бригадир булыу, бригадирлыҡ итеү

**БРИГАДИ́РША** *ж*; *прост.* **1.** *см.* **бригади́р** I; **2.** (*жена бригадира*) бригадирҙың ҡатыны

**БРИГА́ДНИК** *м*; *разг.* бригада ағзаһы

**БРИГА́ДНЫЙ,** -ая, -ое бригада ...ы; **брига́дный меха́ник** бригада механигы; **брига́дный подря́д** бригада подряды

**БРИГАНТИ́НА** *ж*; *мор.* бригантина (*елкәнле еңел судно*)

**БРИДЖ** *м* бридж (*кәрт уйыны*)

**БРИ́ДЖИ** *мн.* бриджи (**1.** *балаҡтарын ҡунысҡа тығып кейә торған салбар* **2.** *ҡыҫҡа балаҡлы спорт салбары*)

**БРИЗ** *м*; *мор.* бриз (*көндөҙ диңгеҙҙән йылыраҡ ярға, төнөн ярҙан йылыраҡ диңгеҙгә табан иҫә торған әкрен ел*)

**БРИЗА́НТНЫЙ,** -ая -ое *спец.* (*разрывной*) бризант, шартлай (ярыла) торған; **бриза́нтные вещества́** шартлай торған матдәләр; **бриза́нтный снаря́д** бризант снаряд

**БРИКЕ́Т** *м* брикет; **у́гольный брике́т** күмер брикеты; **кормовы́е брике́ты** мал аҙығы брикеттары

**БРИКЕТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* брикетлау, брикет яһау (һуғыу); **брикети́ровать торф** торфты брикетлау

**БРИКЕТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* *страд.* *от* **брикети́ровать**

**БРИКЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое брикет; **брике́тное то́пливо** брикет яғыулыҡ

**БРИЛЛИА́НТ** и **БРИЛЬЯ́НТ** *м* бриллиант, гәүһәр

**БРИЛЛИА́НТОВЫЙ** и **БРИЛЬЯ́НТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бриллиант ...ы, гәүһәр ...ы; **бриллиа́нтовая грань** гәүһәр ҡыры **2.** бриллиант, гәүһәр, бриллиант (гәүһәр) менән биҙәлгән, бриллиант (гәүһәр) ҡашлы; **бриллиа́нтовое ожере́лье** бриллиант муйынсаҡ; **бриллиа́нтовый пе́рстень** гәүһәр ҡашлы йөҙөк ♦ **бриллиа́нтовый зелёный** *фарм.* үләндән әҙерләнгән антисептик дарыу

**БРИТА́НСКИЙ,** -ая, -ое Британия ...ы; **Брита́нские острова́** Британия утрауҙары

**БРИТА́НЦЫ** *мн.* (*ед.* **брита́нец** *м*); *книжн.* *см.* **англича́не**

**БРИ́ТВА** *ж* бритва, ҡырыныу (сәс) бәкеһе; **электри́ческая бри́тва** электр бритваһы; **бри́ться бри́твой** сәс бәкеһе менән ҡырыныу

**БРИ́ТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡырыныу ...ы; **бри́твенный прибо́р** ҡырыныу приборы

**БРИТОГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое сәсе ҡырылған (алынған), таҡыр (тайыҙ) баш; **бритоголо́вый челове́к** сәсе ҡырылған (таҡыр башлы) кеше

**БРИ́ТТЫ** *мн.* (*ед.* **бритт** *м*) бриттар (*беҙҙең эраға тиклем VIII б. яңы эраның V б. Британияның төп халҡын тәшкил иткән кельт ҡәбиләләре*)

**БРИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **брить 2.** *прил.* сәсе (һаҡал-мыйығы) ҡырылған (ҡырып алынған); **бри́тая голова́** (сәсе) ҡырылған баш

**БРИТЬ** *несов.* *кого-что* сәсте (һаҡал-мыйыҡты) ҡырыу (ҡырып алыу); **брить бо́роду** һаҡал(ды) ҡырыу; **брить электри́ческой бри́твой** электр бритваһы менән ҡырыу

**БРИТЬЁ** *с* *см.* **брить**, **бри́ться**; **бритьё бороды́** һаҡал ҡырыу

**БРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡырыныу; **бри́ться ка́ждое у́тро** һәр иртә ҡырыныу **2.** ҡырынып йөрөү, һаҡал-мыйыҡ йөрөтмәү

**БРИ́ЧКА** *ж* бричка (*еңел арба*); **рессо́рная бри́чка** сиртмәле бричка

**БРОВА́СТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* ҡуйы ҡалын ҡашлы; **брова́стый челове́к** ҡуйы ҡалын ҡашлы кеше

**БРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое ҡаш ...ы; **бро́вные ду́ги** ҡаш ҡыйғасы

**БРОВЬ** *ж* ҡаш; **чёрные бро́ви** ҡара ҡаш; **бро́ви дуго́й** ҡыйғас ҡаш; **води́ть бровя́ми** ҡаш һикертеү ♦ **и (да́же) бро́вью не пове́сти (не вести́, не шевельну́ть)** ыжламау ҙа, иғтибар итмәү, әйләнеп тә (боролоп та) ҡарамау, бар тип тә белмәү; **не в бровь, а (пря́мо) в глаз** тап өҫтөнә баҫыу (*урынлы әйтелгән һүҙ тураһында*)

**БРОД** *м* кисеү; **ме́лкий брод** һай кисеү; **идти́ бро́дом** кисеүҙән атлау ♦ **не зна́я бро́ду, не су́йся в во́ду** кисеү күрмәй, аяҡ сисмә

**БРОДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әсеү ...ы, асыу ...ы; **броди́льный проце́сс** әсеү процесы **2.** әсетеү ...ы, асытыу ...ы; **броди́льный чан** әсетеү киҫмәге

**БРОДИ́ТЬ I** *несов.* **1.** һәптәнләп (мөстәнләп) йөрөү, ҡыҙырыу, һәптәнләү, мөстәнләү; **броди́ть по у́лице** урам ҡыҙырыу **2.** *перен.* күренеп (сағылып) ҡалыу, сыуалыу (*уй-фекер, йылмайыу билдәләре хаҡында*); **мы́сли бро́дят** уйҙар сыуала

**БРОДИ́ТЬ II** *несов.* әсеү (бызырлау); **пи́во бро́дит** һыра әсеп ултыра

**БРОДЯ́ГА** *м* и *ж* **1.** берәҙәк, ҡыҙырас, мысыр хәйерсеһе (*илһеҙ-ерһеҙ кеше*) **2.** *разг.*, *неодобр.* һуҡбай, йолҡош

**БРОДЯ́ЖИЙ,** -ья, -ье берәҙәк(тәр) ...ы, ҡыҙырас(тар) ...ы, һуҡбай(ҙар)...ы, йолҡош-

(тар) ...ы; **бродя́жья жизнь** ҡыҙырас тормошо; **бродя́жьи привы́чки** һуҡбайҙар ғәҙәте

**БРОДЯ́ЖИТЬ** *несов.*; *разг. см.* **бродя́жничать**

**БРОДЯ́ЖНИЧАТЬ** *несов.* **1.** берәҙәклек итеү, берәҙәк (ҡыҙырас) булып йөрөү **2.** *разг.* (*странствовать без определённой цели*) ҡыҙырып йөрөү, ил гиҙеү

**БРОДЯ́ЖНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое берәҙәклек ...ы, һуҡбайлыҡ ...ы; **бродя́жническая жизнь** берәҙәклек тормошо

**БРОДЯ́ЖНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* берәҙәклек, һуҡбайлыҡ

**БРОДЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее күсеп йөрөгән, күсмә, илгиҙәр; **бродя́чие арти́сты** күсеп йөрөгән артистар; **бродя́чая жизнь** күсмә тормош

**БРОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** әсеү, әсешеү; **у́ксусное броже́ние** һеркә әсеүе **2.** *перен.* сыуалыш, буталыш, бола, ығы-зығы; **броже́ние среди́ рабо́чих** эшселәр араһындағы сыуалыш

**БРО́ЙЛЕР** *м* **1.** (*цыплёнок, выращиваемый на мясо*) бройлер; **мя́со бро́йлера** бройлер ите **2.** (*помещение для выращивания таких цыплят*) бройлер бинаһы

**БРОМ** *м* бром (**1.** *химик элемент* **2.** *нерв системаһын тынысландыра торған дарыу*)

**БРО́МИСТЫЙ,** -ая, -ое *хим.* бромлы; **бро́мистый ка́лий** бромлы калий

**БРОНЕ...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "бронялы", "броня менән ҡапланған" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәç.*, **бронеба́шня** бронялы башня; **бронедрези́на** бронялы дрезина

**БРОНЕАВТОМОБИ́ЛЬ** *м* бронеавтомобиль, бронялы автомобиль, броневик

**БРОНЕБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое броняны тишә торған, броня тишкес; **бронебо́йный снаря́д** броня тишә торған снаряд; **бронебо́йное ору́жие** броня тишкес ҡорал

**БРОНЕБО́ЙЩИК** *м* бронебойщик (*броняны тишә торған ҡоралдан атыусы*)

**БРОНЕВИ́К** *м* броневик (*бронялы автомобиль*)

**БРОНЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** бронялы, броня менән ҡапланған; **бронева́я маши́на** бронялы машина **2.** (*служащий для брони, являющийся бронёй*) броня, броня ...ы; **броневы́е пли́ты** броня плиталар

**БРОНЕКА́ТЕР** *м* бронялы катер, бронекатер

**БРОНЕМАШИ́НА** *ж* бронялы машина, бронемашина

**БРОНЕНО́СЕЦ** *м* **1.** броненосец (*броня менән ҡапланған ҡеүәтле хәрби карап*) **2.** *зоол.* ҡалҡанлы(лар) (*ҡаты ҡалҡан тиреле һөтимәр хайуан*); **семе́йство броненосцев** ҡалҡанлылар ғаиләһе

**БРОНЕНО́СНЫЙ,** -ая, -ое бронялы, броня менән ҡапланған; **броненосный кре́йсер** бронялы крейсер

**БРОНЕПО́ЕЗД** *м* бронялы поезд, бронепоезд

**БРОНЕТРАНСПОРТЁР** *м* бронетранспортёр

**БРО́НЗА** *ж* **1.** бронза, ҡула (*аҡ ҡурғаш ҡушылған баҡыр иретмәһе*) **2.** *собир.* ҡула нәмәләр

**БРОНЗИРОВА́ТЬ** и **БРОНЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* бронзалау, бронза яғыу (йүгертеү); **бронзирова́ть дверну́ю ру́чку** ишек тотҡаһын бронзалау

**БРОНЗИРОВА́ТЬСЯ** и **БРОНЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **бронзирова́ть**

**БРОНЗИРО́ВКА** *ж см.* **бронзирова́ть**

**БРО́НЗОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бронза, бронзанан яһалған; **бро́нзовая статуэ́тка** бронза һын **2.** һарғылт-ҡуңыр, бронза төҫлө ♦ **бро́нзовый век** *археол.* бронза быуаты (дәүере) (*коралҡорамал яһау өсөн бронза ҡулланылған боронғо дәүер*)

**БРОНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **брони́ровать** **2.** *прил.* алдан уҡ бүлеп (тәғәйенләп) ҡалдырылған, беркетеп (тәғәйенләп) ҡуйылған, бронле; **брони́рованное ме́сто** бронле (тәғәйенле) урын

**БРОНИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **бронирова́ть** **2.** *прил.* бронялы, броня менән ҡапланған; **брониро́ванный по́езд** бронялы поезд

**БРОНИ́РОВАТЬ** *несов. что* алдан уҡ бүлеп (тәғәйенләп) ҡалдырыу, беркетеп (тәғәйенләп) ҡуйыу, бронләү; **брони́ровать ме́сто в гости́нице** ҡунаҡханала урын бронләү; **брони́ровать жилу́ю пло́щадь** торлаҡ майҙанды бронләү

**БРОНИРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* бронялау, броня менән ҡаплау (көпләү); **бронирова́ть маши́ну** машинаны бронялау

**БРОНТОЗА́ВР** *м* бронтозавр (*һөйрәлеүселәрҙең үлеп бөткән төрө*)

**БРО́НХИ** *мн.* (*ед.* **бронх** *м*) ҡурылдай (*үпкә көпшәһе*)

**БРОНХИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡурылдай ...ы; **бронхиа́льные же́лезы** ҡурылдай биҙҙәре; **бронхиа́льная а́стма** ҡурылдай астмаһы; бронхиаль астма

**БРОНХИ́Т** *м* бронхит; **о́стрый бронхи́т** көслө бронхит; **хрони́ческий бронхи́т** хроник бронхит; **астмати́ческий бронхи́т** астматик бронхит

**БРО́НЯ** и **БРОНЬ** *ж* бронь (*ниҙеләр алдан уҡ кемгәләр тәғәйенләп, уға беркетеп ҡуйғанды раҫлаған документ*); **бро́ня на железнодоро́жный биле́т** тимер юл билетына бронь; **предоставля́ть бронь** бронь биреү

**БРОНЯ́** *ж* **1.** (*металлическая одежда воина*) ҡояҡ, тимер (ҡорос) күлдәк **2.** (*защитная облицовка*) броня (*ҡорос көп — танк, машина һ.б. өсөн*); **то́лстая броня́** ҡалын броня; **покры́ть бронёй** броня менән көпләү

**БРОСА́НИЕ** *с см.* **броса́ть**, **броса́ться**

**БРОСА́ТЬ** *несов.* **1.** *что, чем* ташлау, ырғытыу, бәреү; **броса́ть грана́ту** граната ырғытыу, **броса́ть ка́мень** таш ташлау **2.** *кого-что* (*перемещать, направлять куда-л.*) (тиҙ генә) күсереү, сығарыу, индереү, йүнәлтеү; **броса́ть войска́ в бой** һуғышҡа ғәскәр индереү; **броса́ть това́ры на ры́нок** баҙарға тауар сығарыу; **броса́ть дополни́тельные сре́дства на строи́тельство** төҙөлөшкә өҫтәмә аҡса күсереү **3.** *перен.* (*распространять, направлять — о свете, тени*) сәсеү, һибеү, таратыу, ташлау; **со́лнце броса́ет лучи́** ҡояш нурҙарын һибә; **броса́ть взгляд** ҡараш ташлау **4.** *кого-что* (*класть небрежно, не на своё место*) теләһә нисек ташлау, атып бәреү, быrғау, бырғытыу, быраҡтырыу; **броса́ть игру́шки как попа́ло** уйынсыҡтарҙы тегендә-бында атып бәреү **5.** *кого-что* (*оставлять, покидать*) (бәйләнеште, мөнәсәбәтте) өҙөү, ташлау, ҡалдырыу, ташлап (ҡалдырып) китеү; **броса́ть семью́** ғаиләне ташлап китеү; **броса́ть друзе́й** дуҫиштәрҙе ташлау; **броса́ть пози́ции** позицияны ҡалдырып китеү **6.** *что* и *с неопр.* (*прекращать что-л. делать*) эш-ҡылыкты өҙөү, ҡалдырыу, ташлау; **броса́ть кури́ть** тәмәкене (тартыуҙы) ташлау; **броса́ть рабо́ту** эште ҡалдырыу; **броса́ть учёбу** уҡыуҙы ташлау **7.** *перен.* (*быстро, небрежно произносить — о слове, реплике*) киҫкен генә әйтеү, әйтеп (ташлау); **броса́ть ре́плику** (урындан) һүҙ ташлау ♦ **броса́ть де́ньги на ве́тер** аҡса туҙҙырыу, аҡсаны әрәм-шәрәм итеү, аҡсаны елгә осороу; **броса́ть за решётку** *кого* төрмәгә ябыу, **броса́ть ка́мень (ка́мнем)** *в кого* берәйһенә бысраҡ ташлау; **броса́ть ка́мешки в огоро́д** *чей, кого* һүҙ ебәреү; баҡсаһына таш ташлау; **броса́ть на произво́л судьбы́** яҙмышты үҙ ағышына тапшырыу; **броса́ть слова́ на ве́тер** файҙаһыҙға һөйләнеү, һүҙҙе елгә осороу (ташлау); **броса́ть тень** *на кого-что* шик һалыу (ташлау), тап төшөрөү, ҡара яғыу; **броса́ть ору́жие** ҡорал ташлау, бирелеү; **броса́ть перча́тку** *кому*: 1) дуэлгә саҡырыу; 2) берәйһе менән алышыу (көрәшеү); **броса́ть свет** *на что* асыҡлау

**БРОСА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем* ырғытышыу, бәрешеү, ташлашыу; **броса́ться снежка́ми** ҡар бәрешеү **2.** *кем-чем*; *перен.* һанға һуҡмау, иҫәпкә алмау, иғтибар итмәү, ҡәҙерен белмәү, баһалап еткермәү **3.** (*прыгать*) һикереү, ырғыу, ташланыу; **броса́ться в во́ду** һыуға һикереү **4.** *на кого-что* (*нападать, кидаться*) ташланыу; **броса́ться на врага́** дошманға ташланыу **5.** (*устремляться куда-л.*) тиҙ генә башлау (тотоноу, керешеү); **броса́ться на по́мощь** тиҙ генә ярҙам итә башлау **6.** (*в порыве чувства устремляться к кому-л.*) ташланыу, аҫылыныу; **броса́ться в объя́тия** ҡосаҡҡа ташланыу; **броса́ться на ше́ю** муйынға аҫылыныу ♦ **броса́ться деньга́ми** аҡсаның ҡәҙерен белмәү; **броса́ться в глаза́** күҙгә салыныу (ташланыу); **броса́ться слова́ми** яуапһыҙ һүҙ ташлау, ауыҙы ни һөйләгәнде ҡолағы ишетмәү; **броса́ться со всех ног** алды-артты ҡарамай, йән-фарман сабыу (йүгереү); **кровь бро́силась ему́ в го́лову** башына ҡан йүгерҙе (*асыуҙан, ярһыуҙан*)

**БРО́СИТЬ** *сов. что* **1.** *см.* **броса́ть** **2.** *повел.* **бро́сь(те)**; *прост.* (*в знач.* “*перестань*(*те*)”, “*оставь*(*те*)”, “*не надо*”) ҡуй (әле), кәрәкмәй, ташла; **брось говори́ть глу́пости** ҡуй әле, юҡ-барҙы һөйләмә ♦ **жре́бий бро́шен** ни булһа ла шул булыр, булыры булған, буяуы һеңгән (уңған); **хоть брось** бер нәмәгә лә ярарлыҡ түгел, бик насар

**БРО́СИТЬСЯ** *сов. см.* **броса́ться**

**БРО́СКИЙ,** -ая, -ое *разг.* күҙгә бәрелеп (ташланып, сағылып) торған, баҙыҡ, бик асыҡ; **бро́ский цвет** баҙыҡ төҫ; **бро́ская красота́** күҙгә бәрелеп торған матурлыҡ

**БРО́СКОСТЬ** *ж*; *разг.* күҙгә бәрелеп (ташланып, сағылып) тороу, баҙыҡ (бик асыҡ) булыу, баҙыҡлыҡ; **плака́тная бро́скость** плакат кеүек баҙыҡлыҡ

**БРО́СОВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* яраҡһыҙ, насар сифатлы, алама, насар; **бро́совый това́р** алама тауар ♦ **бро́совые зе́мли** ташландыҡ ерҙәр

**БРОСО́К** *м* **1.** *см.* **броса́ть** 1 и **броса́ться** 1, 4; **2.** (*стремительное движение*) (киҫкен) ынтылыш; **бросо́к вперёд** алға ынтылыш

**БРО́ШКА** *ж см.* **брошь**

**БРОШЬ** *ж* брошка, төйрәмес; **стари́нная бирюзо́вая брошь** боронғо фирүзә ҡашлы төйрәмес; **приколо́ть брошь к воротнику́** яғаға брошка ҡаҙау

**БРОШЮ́РА** *ж* брошюра; **популя́рная брошю́ра** популяр брошюра; **чита́ть брошю́ру** брошюра уҡыу

**БРОШЮРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое брошюралау ...ы; **брошюрова́льный стано́к** брошюралау станогы; **брошюрова́льная маши́на** брошюралау машинаһы

**БРОШЮРОВА́НИЕ** *с см.* **брошюрова́ть**

**БРОШЮРОВА́ТЬ** *несов. что* брошюралау, брошюровкалау; **брошюрова́ть кни́гу** китап брошюралау

**БРОШЮРО́ВКА** *ж см.* **брошюрова́ть**

**БРОШЮРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое брошюралау ...ы; **брошюро́вочная рабо́та** брошюралау эше

**БРОШЮРО́ВЩИК** *м* и **БРОШЮРО́ВЩИЦА** *ж* брошюралаусы

**БРУ́ДЕР** *м*; *с.-х.* брудер (*инкубатор себештәрен йылыта торған прибор*)

**БРУДЕРША́ФТ: пить на брудерша́фт** брудершафт эсеү (*дуҫлашыу хөрмәтенә айырым бер төрлө сәкәшеп эсеү*)

**БРУС** *м* **1.** бурса (*дүрт ҡырлы итеп яһалған ағас, таш, металл*); **мра́морный брус** мәрмәр бурса; **ка́менный брус** таш бурса **2.** *см.* **брусок** 3;

3. *мн.* **бру́сья** *спорт.* брусья (*махсус гимнастика королмаһы*)

**БРУСКО́ВЫЙ,** -ая, -ое дүрт ҡырлы, киҫәкле; **бруско́вое мы́ло** киҫәкле һабын

**БРУСНИ́КА** *ж* ҡыҙыл көртмәле

**БРУСНИ́ЧНИК** *м* ҡыҙыл көртмәлелек

**БРУСНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл көртмәле ...ы; **брусни́чное варе́нье** ҡыҙыл көртмәле ҡайнатмаһы

**БРУСО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **брус** **2.** *чего* киҫәк (*дүрт ҡырлы*); **брусо́к мы́ла** бер киҫәк һабын; **брусо́к ма́сла** бер киҫәк май **3.** ҡайраҡ, беләү, яныуыс; **точи́ть нож на бруске́** бысаҡты ҡайраҡ менән ҡайрау

**БРУСО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бурса ...ы; **брусо́чное произво́дство** бурса етештереү **2.** (*имеющий форму бруска*) киҫәкле; **брусо́чное мы́ло** киҫәкле һабын

**БРУ́СТВЕР** *м*; *воен.* бруствер (*дошмандан һаҡланыу өсөн окоп алдына өйөлгән тупраҡ*); **бру́ствер око́па** окоп брустверы; **укры́ться за бру́ствером** брустверға ышыҡланыу

**БРУСЧА́ТКА** *ж* брусчатка (**1.** *шаҡмаҡлап ваҡланған таш* **2.** *таш түшәлгән урам*)

**БРУСЧА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** бурса, бурсанан яһалған; **брусча́тый дом** бурса йорт **2.** брусчатка түшәлгән, брусчаткалы; **брусча́тая у́лица** брусчатка түшәлгән урам

**БРУ́ТТО** *прил.* и *нареч. неизм.*; *спец.* брутто (*тауарҙың төргәге менән ауырлығы*); **вес бру́тто** брутто ауырлығы

**БРУЦЕЛЛЁЗ** *м*; *вет.* бруцеллёз (*йоғошло мал ауырыуы*); **боле́ть бруцеллёзом** бруцеллёз менән ауырыу; **зарази́ться бруцеллёзом** бруцеллёз йоҡтороу

**БРУЦЕЛЛЁЗНЫЙ,** -ая, -ое бруцеллёз ...ы; **бруцеллёзная па́лочка** бруцеллёз таяҡсаһы

**БРЫЖЕ́ЙКА** *ж*; *анат.* эс ярыһы, йыйырса, ҡатлы шекәрә (*корһаҡта эсәктәрҙе тотоп торған яры*)

**БРЫ́ЗГАТЬ** *несов.* **1.** *чем* сәсрәтеү, сәсеү; **бры́згать водо́й** һыу сәсрәтеү; **бры́згать слюно́й** (*при разговоре*) төкөрөк сәсеү **2.** *перен.* (тирә-яҡҡа) осороу, сәсрәтеү; **и́скры бры́зжут** осҡондар сәсрәй **3.** *что* и *без доп.* һибеү, бөркөү, һиптереү; **бры́згать бельё** кергә һыу бөркөү; **бры́згать лицо́ водо́й** биткә һыу бөркөү **4.** *перен.* (*наст.* **бры́зжет**) аңҡып (бәреп, бөркөп) тороу, урғылып (тышҡа сығып) тороу; **лицо́ его́ бры́зжет ра́достью** йөҙө шатлыҡ бөркөп тора; **бры́зжет мо́лодостью** йәшлек аңҡып тора

**БРЫ́ЗГАТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем см.* **бры́згать** 1, 2, 3; **ма́сло бры́згалось** май сәсрәй ине **2.** (*брызгать друг на друга*) сәсрәтешеү, һибешеү, бөркөшөү; **де́ти бры́згались водо́й** балалар һыу һибеште

**БРЫ́ЗГИ** *только мн.* **1.** сәсрәмә, сәсрәгән (бөркөлгән) тамсылар; **бры́зги воды́** һыу сәсрәмәһе **2.** *чего* сәсрәгән ярсыҡтар, киҫәксәләр; **бры́зги оско́лков** сәсрәгән ярсыҡтар

**БРЫ́ЗНУТЬ** *сов.* **1.** сәсрәп (һибелеп) китеү, сәсрәтеп (тамыҙып) ебәреү; **бры́знуть ма́слом на пла́тье** күлдәккә май сәсрәтеп ебәреү **2.** (*вдруг политься*) атылып (бәрелеп) сығыу; **бры́знули слёзы** күҙ йәштәре атылып сыҡты **3.** яуа (һибәләй, ҡоя) башлау; **бры́знул дождь** ямғыр һибәләй башланы **4.** *перен.* (*внезапно появиться, показаться — о лучах солнца и т.д.*) балҡыу, балҡып китеү; **бры́знули лучи́ весе́ннего со́лнца** яҙғы ҡояш нурҙары балҡып китте

**БРЫКА́ТЬ** *несов.* **1.** тибеү; **ло́шадь брыка́ет** ат тибешә **2.** (*дрыгать*) тыпырсыныу, тулау; **ребёнок брыка́ет но́жками** бала тыпырсына

**БРЫКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тибенеү, тибешеү; **осторо́жно, э́та ло́шадь брыка́ется** һаҡ бул, был ат тибешә **2.** (*брыкать друг друга*) тибешеү

**БРЫКЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое тибешкәк, тибешә торған; **брыкли́вый конь** тибешкәк ат

**БРЫЛА́СТЫЙ,** -ая, -ое һалбыр, һалынып торған томшоҡло (*этккә ҡарата*); **брыла́стая соба́ка** һалбыр томшоҡло эт

**БРЫЛЫ́** *мн.* (*ед.* **брыла́** *ж*) ҡалын (һалынып торған) томшоҡ

**БРЫ́НЗА** *ж* брынза (*һарыҡ һөтөнән яһалған сыр*); **приготовле́ние бры́нзы** брынза яһау

**БРЫСЬ** *межд.* брес (*бесәйҙе ҡыуа торған һүҙ*)

**БРЮЗГА́** *м* и *ж* мығырлаҡ (мыжыҡ) кеше, ыжыҡа

**БРЮЗГЛИ́ВОСТЬ** *ж* мығырлаҡ (мыжыҡ) булыу, мыжыҡлыҡ

**БРЮЗГЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое мығырлаҡ, мыжыҡ; **брюзгли́вый стари́к** мыжыҡ ҡарт

**БРЮ́ЗГНУТЬ** *несов.* (*болезненно полнеть, отекать*) ауырып йыуанайыу, шешенеү

**БРЮЗЖА́НИЕ** *с см.* **брюзжа́ть**; **ста́рческое брюзжа́ние** ҡартлыҡ мыжыҡлығы

**БРЮЗЖА́ТЬ** *несов.* мығырлау, мыжыу, һуҡраныу

**БРЮ́КВА** *ж* аңра шалҡан, гәрәнкә; **сажа́ть брю́кву** аңра шалҡан сәсеү

**БРЮ́КВЕННЫЙ,** -ая, -ое аңра шалҡан, гәрәнкә ...ы, гәрәнкәнән яһалған; **брю́квенная ботва́** гәрәнкә һабағы; **брю́квенный со́ус** гәрәнкә соусы

**БРЮ́КИ** *только мн.* салбар; **же́нские брю́ки** ҡатын-ҡыҙ салбары; **спорти́вные брю́ки** спорт салбары; **наде́ть брю́ки** салбар кейеү

**БРЮНЕ́Т** *м* брюнет, ҡара сәсле ир; **брюне́тка** *ж* брюнетка, ҡара сәсле ҡатын-ҡыҙ

**БРЮХА́СТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* йыуан ҡорһаҡлы, ҙур эсле

**БРЮ́ХО** *с* **1.** ҡорһаҡ, бауыр, эс (*хайуандарға ҡарата*); **ло́шадь провали́лась по брю́хо** ат бауырына тиклем батты **2.** ҡорһаҡ, эс (*кешегә ҡарата*); **то́лстое брю́хо** йыуан ҡорһаҡ ♦

**по́лзать на брю́хе** *перед кем*; *прост.* табанын ялау, ярамһаҡланыу

**БРЮХОВИ́НА** *ж*; *анат.* ашҡаҙан, ҡорһаҡ эсе (*көйөшлө малға ҡарата*)

**БРЮ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** салбар ...ы, салбар тегеү ...ы; **брю́чный цех** салбар тегеү цехы **2.** (*предназначенный для брюк*) салбарлыҡ; **брю́чный материа́л** салбарлыҡ тауар; **брю́чная пу́говица** салбар төймәһе ♦ **брю́чный костю́м** салбарлы костюм (*ҡатын-ҡыҙ кейеме*)

**БРЮШИ́НА** *ж*; *анат.* ҡорһаҡ ярыһы; **воспале́ние брюши́ны** ҡорһаҡ ярыһының шешеүе

**БРЮ́ШКО** и **БРЮШКО́** *с* **1.** *уменьш.-ласк. от* **брю́хо** **2.** *разг.*, *шутл.* күпкән (йыуан) ҡорһаҡ **3.** (*у маленьких животных и птиц*) ҡорһаҡ, түш, бауыр; **котёнок с бе́лым брюшко́м** аҡ ҡорһаҡлы бесәй балаһы **4.** (*задний отдел членистоногих*) эс, ҡорһаҡ; **брюшко́ ба́бочки** күбәләк ҡорһағы **5.** *обычно мн.* **брюшки́** (*мех с брюшной части животных*) ҡорһаҡ тиреһе; **шу́ба из брюшко́в бе́лки** тейендең ҡорһаҡ тиреһенән тегелгән тун

**БРЮШНО́Й,** -ая, -ое ҡорһаҡ ...ы, эс ...ы; **брюшна́я по́лость** ҡорһаҡ ҡыуышлығы ♦ **брюшно́й тиф** ҡорһаҡ тифы

**БРЯК** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* шап итеп бәрелеү (һуғылыу, йығылыу); **бряк в окно́** тәҙрәгә шап иттереп һуҡты; **кни́га бряк на́ пол** китап иҙәнгә шап итеп килеп төштө

**БРЯ́КАНЬЕ** *с см.* **бря́кать**

**БРЯ́КАТЬ** *несов. см.* **бря́кнуть**

**БРЯ́КАТЬСЯ** *несов. см.* **бря́кнуться**

**БРЯ́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *чем* сылтырап (шалтырап) китеү, сылтыратыу, шалтыратыу, сылтыратып (шалтыратып) ҡуйыу; **бря́кнуть посу́дой** һауыт-һаба шалтыратыу **2.** *кого-что* (*с силой бросить, уронить*) шап иттереп төшөрөү, төшөрөп ебәреү, атып бәреү (ебәреү); **он бря́кнул на стол ключи́** ул асҡысты өҫтәлгә атып бәрҙе **3.** *перен. что* и *без доп.* (*необдуманно сказать*) һүҙ ысҡындырыу, (уйламай-нитмәй) әйтеп ебәреү (һалыу); **бря́кнул некста́ти** урынһыҙ әйтеп һалыу

**БРЯ́КНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* лап (шап) итеп барып (йығылып) төшөү, дөп итеп ҡалыу; **бря́кнуться на́ пол** иҙәнгә шап итеп барып төшөү

**БРЯЦА́НИЕ** *с см.* **бряца́ть**; **бряца́ние бубе́нчика** шөңгөр зыңғырлауы

**БРЯЦА́ТЬ** *несов.*; *книжн.* **1.** шылтырау, сыңғырлау, зыңлау, зыңғырлау, сыңлау; **бряца́ли са́бли** ҡылыстар зыңланы **2.** *чем* (*бренчать*) шылтыратыу, зыңғырлатыу, сыңғырлатыу; **бряца́ть шпо́рами** тибенге сыңғырлатыу ♦ **бряца́ть ору́жием** һуғыш менән ҡурҡытыу (янау)

**БУ́БЕН** *м* и **БУ́БНЫ** *мн.* шөңгөр, дөңгөр (*уйын ҡоралы*); **бить в бу́бен** дөңгөр ҡағыу

**БУБЕНЕ́Ц** *м* шөңгөр (*бәләкәй генә йоморсаҡ ҡыңғырау*); **звеня́т бубенцы́** шөңгөрҙәр сыңлай

**БУ́БЛИК** *м* бублик, керәндил; **угоща́ть бу́бликами** керәндил менән һыйлау

**БУБНИ́ТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* мығырлау, лығырлау, һуҡраныу; **бубни́ть себе́ под нос** танау аҫтынан мығырлау

**БУБНО́ВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **бу́бны** I; **бубно́вый вале́т** бубий валет; **бубно́вая деся́тка** бубий унлыҡ

**БУ́БНЫ I** *мн.* (*ед.* **бу́бна** *ж*; *прост.*) бубий (*ҡыҙыл ромбиклы кәрттәр*)

**БУ́БНЫ II** *мн. см.* **бу́бен**

**БУБО́Н** *м*; *мед.* бубон (*лимфатик биҙҙәр шешеүе*)

**БУГА́Й** *м*; *прост.* боға, үгеҙ

**БУ́ГЕЛЬ** *м*; *тех.* **1.** бугель (*мачта, свайҙарҙы нығытыу өсөн ҡулланылған тимер ҡуласа*) **2.** дуға; **бу́гель трамва́я** трамвай дуғаһы

**БУГО́Р** *м* **1.** түбә, түмәләс; **подня́ться на буго́р** түмәләскә менеү **2.** (*небольшое возвышение на чём-л.*) ҡалҡыулыҡ, суҡаҡ, соңҡа; **ло́бный бугор** маңлай суҡағы; **бугор заты́лочной ко́сти** соңҡа

**БУГОРО́К** *м* **1.** түмһәләк; **бугоро́к ве́рхней губы́** өҫкө ирен түмһәләге; **суставно́й бугоро́к** быуын түмһәләге **2.** *мед.* төйөрсөк (*туберкулёз менән ауырығанда үпкәләге ҡаты төйөрҙәр*) **3.** *уменьш. от* **бугор**

**БУГО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое ҡытырмаҡлы, төйөрсөклө, суғырмаҡлы; **бугорчатая пове́рхность** ҡытырмаҡлы йөҙ

**БУГРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** түмәләсле; **бугри́стая ме́стность** түмәләсле урын **2.** суғырмаҡлы, түңгәкле, ҡытыршы; **бугри́стая доро́га** суғырмаҡлы юл

**БУГРИ́ТЬСЯ** *несов.* түмәләсле, суғырмаҡлы булыу, суғырмаҡланыу, түңгәкләнеү; **па́шня бугри́тся смёрзшимися комка́ми** баҫыу туң кәҫтәр менән суғырмаҡланып бөткән

**БУДА́РА** *ж* буҙар (*йөк кәмәһе*)

**БУДДИ́ЗМ** *м* буддизм, Будда дине (*яңы эраға тиклемге VI б. аҙағында Төньяҡ Һиндостанда барлыҡҡа килеп, Тибет, Монголия, Һинд Ҡытайы, Ҡытай, Мьянма* (*Бирма*), *Япония һәм башҡа ҡайһы бер Көнсығыш илдәрҙә таралған дин*)

**БУДДИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Будда ...ы, буддизм ...ы; **будди́йское уче́ние** буддизм тәғлимәте; **будди́йская рели́гия** Будда дине

**БУДДИ́СТ** *м* и **БУДДИ́СТКА** *ж* буддист (*Будда динен тотоусы*)

**БУДЁНОВЕЦ** *м* будёновсы (*Граждандар һуғышында С.М.Будённый командалығында хеҙмәт иткән яугир*)

**БУДЁНОВКА** *ж* будёновка (*ҡыҙылармеецтарҙың баш кейеме*)

**БУДИ́ЛЬНИК** *м* будильник; **завести́ буди́льник** будильникты бороп ҡуйыу; **буди́льник зазвене́л** будильник шылтыраны

**БУДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* уятыу; **буди́ть ребёнка** баланы уятыу **2.** *что*; *перен.* уятыу, ҡуҙғатыу, тыуҙырыу; **буди́ть любо́вь к родно́му языку́** әсә теленә һөйөү уятыу

**БУ́ДКА** *ж* будка; **сторожева́я бу́дка** ҡарауылсы будкаһы; **железнодоро́жная бу́дка** тимер юл будкаһы ♦ **суфлёрская бу́дка** суфлёр будкаһы

**БУ́ДНИ** *мн.* (*ед.* **бу́день** *м*; *уст.*, *прост.*) **1.** эш (хеҙмәт) көнө, ғәҙәти (ҡәҙимге, ябай) көн; **трудовы́е бу́дни** ғәҙәти хеҙмәт көндәре **2.** *перен.* көндәлек (ғәҙәти, ҡәҙимге) тормош **3.** *перен.* (*безрадостная жизнь*) күңелһеҙ, эс бошорғос (бер төрлө) тормош

**БУ́ДНИЙ,** -яя, -ее ғәҙәти, ҡәҙимге; **бу́дний день** ғәҙәти көн

**БУ́ДНИЧНЫЙ,** -ая, -ое и *разг.* **БУ́ДНИШНИЙ,** -яя, -ее **1.** эш …ы, хеҙмәт …ы, ғәҙәти, ҡәҙимге; **бу́дничный день** эш көнө **2.** (*предназначенный для будней*) эш …ы, эшкә (әрһеҙгә) кейә торған; **бу́дничное пла́тье** эш кейеме, эш күлдәге **3.** *перен.* (*повседневный*) көндәлек, көн дә була торған; **бу́дничная рабо́та** көндәлек эш **4.** *перен.* (*однообразный, безрадостный*) күңелһеҙ, эс бошорғос, бер төрлө; **бу́днишняя жизнь** эс бошорғос (бер төрлө) тормош

**БУДОРА́ЖИТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* (*приводить в беспорядок*) туҙҙырыу, ығы-зығы килтереү, ҡуҙғытыу, ярһытыу; **будора́жить наро́д** халыҡты ҡуҙғытыу

**БУДОРА́ЖИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ығы-зығы килеү, ярһыу, ҡуҙғыу, тынысһыҙланыу

**БУ́ДОЧНИК** *м*; *разг.* ҡарауылсы (*будкала ҡарауылда тороусы*)

**БУ́ДТО** *союз* и *частица* **1.** *союз сравн.* (*как, словно*) кеүек, һымаҡ, шикелле, әйтерһең, гүйә; -дай/-дәй; **мерца́ет, бу́дто звезда́** йондоҙ кеүек (йондоҙҙай) емелдәй

**2.** *союз изъяснит.* (*что*) тип, икән (имеш) тип; **говоря́т, бу́дто ты ско́ро защища́ешь диссерта́цию** һине тиҙҙән диссертация яҡлай, имеш, тиҙәр

**3.** *частица вопр.*; *разг.* (*разве, неужели, так ли*) шулаймы ни, -мы/-ме ни; **уж бу́дто ты так спеши́шь домо́й?** һин шулай өйгә ашығаһыңмы ни?

**4.** *частица*; *разг.* (*кажется*) әйтерһең дә, гүйә, шикелле, кеүек, һымаҡ, әйтерһең (дә инде), йәнәһе; **ты мне бу́дто э́того не говори́л** һин миңә быны әйтмәгән инең шикелле

**БУДУА́Р** *м* будуар (*бай ҡатындарҙың кейенеү-яһаныу һәм яҡын ҡунаҡтар ҡабул итеү бүлмәһе*)

**БУ́ДУЩИЙ,** -ая, -ее **1.** (*предстоящий*) киләсәк, буласаҡ, алдағы, киләсәктәге; **бу́дущее поколе́ние** киләсәк быуын; **бу́дущая неве́стка** буласаҡ килен **2.** (*следующий*) киләһе; **бу́дущей весно́й** киләһе яҙ; **на бу́дущий год** киләһе йылға, йәрингә **3.** *в знач. сущ.* **бу́дущее** *с* киләсәк; **счастли́вое бу́дущее** бәхетле киләсәк; **в недалёком бу́дущем** яҡын киләсәк(тәге) ♦ **бу́дущее вре́мя** *грам.* киләсәк заман

**БУ́ДУЩНОСТЬ** *ж* **1.** (*состояние*) *кого-чего-л.* киләсәк, киләсәк көн; **бу́дущность респу́блики** республиканың киләсәге; **неизве́стная бу́дущность** билдәһеҙ киләсәк **2.** (*судьба, успех*) яҡшы киләсәк, бәхетле яҙмыш (тәҡдир)

**БУЁК** *м* буй, ҡалҡҡы, ҡалҡма, ҡалҡыуыс (*ау һалған урынды һ.б. һыу төбөндәге нәмәләрҙең тәңгәлен күрһәтеү өсөн йөҙҙөрөп ҡуйылған билдә*)

**БУ́ЕР** *м* буер, елкәнле сана

**БУЕРА́К** *м*; *обл.* йырғанаҡ, йырҙа, йырын, гөрләүек

**БУЕРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *обл.* йырғанаҡлы, йырғанаҡтар менән телгеләнгән; **буера́чная ме́стность** йырғанаҡлы урын

**БУЕРИ́СТ** *м* буерсы (*буер ярышында ҡатнашыусы*); **соревнова́ние буери́стов** буерсылар ярышы

**БУ́ЕРНЫЙ,** -ая, -ое буер …ы; **бу́ерный спорт** буер спорты

**БУЖ** *м* буж (*көпшә формаһындағы ағзаларҙы тикшереү һәм киңәйтеү өсөн инструмент*); **буж уретра́льный** уретра (һейеү каналы) бужы

**БУЖЕНИ́НА** *ж* буженина (*махсус ысул менән бешерелгән суҡа ите*)

**БУЗА́ I** *ж*; *этн.* буҙа (*һоло, арпа йәки бойҙай ярмаһынан ҡайнатып әсеткән эсемлек*); **изготовле́ние бузы́** буҙа ҡойоу; **угоща́ть бузо́й** буҙа менән һыйлау

**БУЗА́ II** *ж*; *прост.* дау, ғауға, янъял, шаушыу, бола, ығы-зығы, тәртипһеҙлек, ыҙғыш; **зава́ривать бузу́** шау-шыу күтәреү

**БУЗИ́ЛА** *м* и *ж*; *прост.* дау ҡуптарыусы, ғауғасы, янъялсы, боласы

**БУЗИНА́** *ж* өсҡат, бүре емеше, мәрүәр; **кра́сная бузина́** ҡыҙыл мәрүәр; **чёрная бузина́** ҡара мәрүәр

**БУЗИ́ННИК** *м* өсҡат (мәрүәр, бүре емеше) ҡыуаҡлығы

**БУЗИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое өсҡат …ы, бүре емеше …ы, мәрүәр …ы, **бузи́новый куст** өсҡат (мәрүәр, бүре емеше) ҡыуағы

**БУЗИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* шау-шыу күтәреү, дау ҡуптарыу, бола сығарыу

**БУЗОТЁР** *м* и **БУЗОТЁРКА** *ж*; *прост.*, *неодобр.* боласы, янъялсы, ғауғасы, даусы

**БУЙ** *м* ҡалҡыуыс (*һыу төбөндәге нәмәнең тәңгәлен, һай урынды, ау һалған ерҙе һәм башҡаларҙың урынын күрһәтеү өсөн йөҙҙөрөп ҡуйылған билдә*)

**БУ́ЙВОЛ** *м* буйвол, һыу һыйыры; **бу́йволица** *ж* инә буйвол, инә һыу һыйыры (*эре көйөшлө мал, йорт хайуаны итеп аҫрала*)

**БУЙВОЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое буйвол ...ы, һыу һыйыры ...ы; **буйволи́ное копы́то** буйвол тояғы

**БУ́ЙВОЛОВЫЙ,** -ая, -ое буйвол ...ы, һыу һыйыры ...ы; **бу́йволовые рога́** буйвол (һыу һыйыры) мөгөҙө; **бу́йволовая шку́ра** буйвол (һыу һыйыры) тиреһе

**БУ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*необузданный*) ғауғасыл, ҡотороҡ, һуғышсан; **бу́йный челове́к** ғауғасыл кеше **2.** *трад.-поэт.* (*удалой, смелый*) тәүәккәл, сая, үткер, батыр, ҡыйыу; **бу́йный мо́лодец** батыр егет **3.** *трад.-поэт.* (*порывистый*) көслө, ҡеүәтле, ҡаты; **бу́йный ве́тер** көслө ел **4.** *перен.* (*пылкий, страстный*) янып торған, дәртле, ҡайнар; **бу́йное жела́ние** ҡайнар теләк **5.** (*пышный — о растительности*) шәп (ҡотороп) үҫкән, ҡуйы; **бу́йные тра́вы** ҡотороп үҫкән үлән ♦ **бу́йная голо́вушка** баш бирмәҫ

**БУ́ЙСТВО** *с* **1.** *см.* **бу́йный** 1; **2.** (*бесчинство*) янъял ҡуптарыу, тәртипһеҙлек

**БУ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* ҡотороноу, башбаштаҡлыҡ (тәртипһеҙлек) ҡылыу, дау (янъял, бола) ҡуптарыу

**БУК** *м* бук (*ағас*)

**БУ́КА** *м* и *ж*; *разг.* **1.** (*фантастическое существо, которым пугают детей*) бапаҡ, боҡай; **не плачь, бу́ка тебя́ унесёт** илама, юғиһә бапаҡ алып китер **2.** (*угрюмый человек*) ҡырыҫ, төйтөк, ҡараңғы сырайлы кеше ♦ **смотре́ть бу́кой (бу́ка-бу́кой)** ҡараңғы сырай күрһәтеү, ҡырыҫлыҡ күрһәтеү

**БУКА́ШКА** *ж* ваҡ бөжәк-мөжәк

**БУ́КВА** *ж* **1.** (*знак*) хәреф; **прописна́я бу́ква** баш хәреф; **стро́чная бу́ква** бәләкәй хәреф **2.** *чего*; *перен.* (*формальная сторона чего-л.*) хәреф, формаль яҡ; **соблюда́ть бу́кву зако́на** законды формаль яҡтан үтәү ♦ **бу́ква в бу́кву** һүҙмә-һүҙ

**БУКВА́ЛЬНО** *нареч.* **1.** һүҙмә-һүҙ; **переводи́ть буква́льно** һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү **2.** *разг.* ысынлап та, һис тә; **у меня́ нет буква́льно ни одного́ свобо́дного дня** минең ысынлап та бер генә лә буш көнөм юҡ

**БУКВА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** һүҙмә-һүҙ (үҙгәрешһеҙ) булыу; **буква́льность перево́да** тәржемәнең һүҙмә-һүҙ булыуы **2.** (*точность*) теүәллек, дөрөҫлөк, тура мәғәнә

**БУКВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һүҙмә-һүҙ; **буква́льный перево́д** һүҙмә-һүҙ тәржемә **2.** (*точный*) тура, дөрөҫ; **в буква́льном смы́сле** тура мәғәнәһендә

**БУКВА́РНЫЙ,** -ая, -ое (*производимый по букварю*) әлифба ...ы, әлифба буйынса өйрәтеү ...ы; **буква́рный пери́од обуче́ния гра́моте** уҡырға-яҙырға өйрәтеүҙең әлифба осоро

**БУКВА́РЬ** *м* әлифба, әлифба китабы; **учи́ться по букварю́** әлифбанан уҡыу

**БУ́КВЕННЫЙ,** -ая, -ое хәрефле, хәреф(тәр) менән; **бу́квенное обозначе́ние** хәрефтәр менән билдәләү; **бу́квенное уравне́ние** хәрефле тигеҙләмә

**БУКВОЕ́Д** *м*; *ирон.* (*формалист*) ваҡсыл (темтек) кеше, хәреф ҡоло

**БУКВОЕ́ДСТВО** *с*; *ирон.* ваҡсыл (темтек, хәреф ҡоло) булыу

**БУКЕ́Т** *м* **1.** букет, гөлләмә; **буке́т роз** роза гөлләмәһе; **подари́ть буке́т цвето́в** сәскә гөлләмәһе бүләк итеү **2.** (*ароматические свойства*) үҙенә бер төрлө хуш еҫ, тәмле тат; **буке́т ча́я** сәйҙең үҙенә бер төрлө хуш еҫе

**БУКЕТИРО́ВКА** *ж*; *с.-х.* букетлау (*үҫемлектәр рәтен һирәкләтеү ысулы*); **букетиро́вка са́харной свёклы** шәкәр сөгөлдөрөн букетлау

**БУКИНИ́СТ** *м* букинист (*иҫке китаптар йыйып һатыусы*)

**БУКИНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое букинистика ...ы, букинистик; **букинисти́ческий магази́н** букинистика магазины; **букинисти́ческая кни́га** букинистик китап (*һирәк осрай торған китап*)

**БУКЛЕ́Т** *м* буклет; **рекла́мный букле́т** реклама буклеты; **букле́т с ви́дами го́рода** ҡала күренештәре төшөрөлгән буклет

**БУ́КОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бук ...ы; **бу́ковое де́рево** бук ағасы; **бу́ковые оре́хи** бук сәтләүеге **2.** бук, бук ағасынан яһалған; **бу́ковая ме́бель** бук ағасынан яһалған мебель **3.** *в знач. сущ.* **бу́ковые** *мн.*; *бот.* бук һымаҡтар ғаиләһе (*имән, бук, каштан һәм башҡалар инә*)

**БУКО́ЛИКА** *ж*; *лит.* буколика (*көтөүселәр тормошон идеаллаштырып һүрәтләгән әҙәбиәт*)

**БУКОЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лит.* буколика ...ы, буколик; **буколи́ческая поэ́зия** буколик шиғриәт

**БУ́КСА** *ж* букса (*паровоз, вагон баҫымын тәгәрмәс күсәренә бирә торған подшипниклы металл ҡумта*)

**БУКСИ́Р** *м* буксир (*тартып йәки этеп йөк йөрөтә торған карап, трактор, машина һәм уның канаты*); **букси́р тяну́л ба́ржу** буксир баржаны тарта ине ♦ **брать (взять) на букси́р** *кого* буксирға алыу (*ярҙам ҡулы һуҙыу*)

**БУКСИ́РНЫЙ,** -ая, -ое буксир ...ы; **букси́рный парохо́д** буксир пароходы

**БУКСИ́РОВАНИЕ** *с см.* **букси́ровать**

**БУКСИ́РОВАТЬ** *несов. что* канатҡа тағыу, һөйрәп (этеп тартып) барыу, буксирлау; **парохо́д букси́рует ба́ржу** карап баржаны һөйрәп бара

**БУКСИРО́ВКА** *ж см.* **букси́ровать**; **буксиро́вка корабля́** карапты буксирлау

**БУКСОВА́ТЬ** *несов.* буксовать итеү (*тайғаҡ, батҡаҡ һ.б. урында батып, китә алмай тороу — тәгәрмәскә ҡарата*)

**БУЛАВА́** *ж* **1.** суҡмар (*боронғо һуғыш ҡоралы*); **уда́рить булаво́й** суҡмар менән һуғыу **2.** булава, таяҡ (*түрәлек һәм дәрәжә билдәһе булған йомро башлы ҡул таяғы*); **ге́тманская булава́** гетман таяғы **3.** *спорт.* булава (*гимнастика ҡоралы*); **упражне́ние с булава́ми** булавалар менән күнекмә

**БУЛА́ВКА** *ж* **1.** булавка, төйрәүес; **приколо́ть була́вку** төйрәүес ҡаҙау **2.** булавка (биҙәүес); **була́вка для га́лстука** галстук булавкаһы ♦ **на була́вки** (*о деньгах*) *уст.* ҡулаҡса, кеҫә аҡсаһы

**БУЛА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое төйрәүес ...ы, булавка ...ы; **була́вочная голо́вка** төйрәүес (булавка) башы ♦ **с була́вочную голо́вку** энә осондай ғына, бик бәләкәй генә

**БУЛА́НЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) ҡола (*кәүҙәһе ҡыҙғылт-һары, ҡойроҡ-ялы ҡара ат*); **була́ная кобы́ла** ҡола бейә

**БУЛА́Т** *м* **1.** булат, ҡорос (*ҡорал өсөн ҡойолған боронғо ҡорос*) **2.** *уст.*, *трад.-поэт.* ҡорос ҡылыс, хәнйәр; **точи́ть була́т** хәнйәр үткерләү

**БУЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое булат, булаттан яһалған; **була́тный клино́к** булат ҡылыс (хәнйәр)

**БУ́ЛКА** *ж* булка, күмәс; **сдо́бная бу́лка** аҡ күмәс; **бу́лка с изю́мом** йөҙөмлө күмәс

**БУ́ЛЛА** *ж* булла (*Рим Папаһының грамотаһы, яҙма мөрәжәғәте*)

**БУ́ЛОЧНАЯ** *ж* күмәсхана

**БУ́ЛОЧНИК** *м* и **БУ́ЛОЧНИЦА** *ж* **1.** күмәс (булка) бешереүсе **2.** күмәс (булка) һатыусы; **рабо́тать бу́лочником** күмәс һатыусы булып эшләү

**БУ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое булка, күмәс, икмәк; **бу́лочные изде́лия** һәр төрлө ваҡ икмәк (күмәс, булка)

**БУЛТЫ́Х** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* шабыр, шабыр-шобор, гөмбөр, гөмбөр-гөмбөр; **он булты́х в во́ду** ул һыуға гөмбөр (итте)

**БУЛТЫХА́ТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** шомбор итеп ырғытыу (*һыуға*) **2.** *без доп. см.* **бултыха́ться** 1; **3.** болғатыу; **бултыха́ть лека́рство** дарыуҙы болғатыу

**БУЛТЫХА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** шомбор (сумбыр, супыр, супыр-супыр) итеп төшөп китеү (*һыуға*) **2.** ҡарпыу; **в реке́ бултыха́ется ры́ба** йылғала балыҡ ҡарпый **3.** сайпылыу, сайҡалып түгелеү; **вода́ бултыха́ется в бо́чке** мискәлә һыу сайпыла

**БУЛТЫ́ХНУТЬ** и **БУЛТЫХНУ́ТЬ** *сов. см.* **бултыха́ть**

**БУЛЫ́ГА** *ж собир. см.* **булы́жник**

**БУЛЫ́ЖНИК** *м* и **БУЛЫ́ГА** *ж* суйырташ; **вы́мощенная булы́жником у́лица** суйырташ түшәлгән урам

**БУЛЫ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое суйырташлы, суйырташ түшәлгән; **булы́жная мостова́я** суйырташ түшәлгән урам

**БУЛЬ-БУ́ЛЬ** *межд.* бүлк, бүлк-бүлк, бутыр-бутыр

**БУЛЬВА́Р** *м* бульвар; **идти́ по бульва́ру** бульвар буйлап барыу

**БУЛЬВА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бульвар ...ы; **бульва́рная алле́я** бульвар аллеяһы **2.** *перен.* бульвар; **бульва́рный рома́н** бульвар романы (*бик үк юғары булмаған зауыҡҡа иҫәп тотоп яҙылған роман*)

**БУЛЬДО́Г** *м* бульдог (*эт тоҡомо*)

**БУЛЬДО́ЖИЙ,** -ья, -ье бульдог ...ы; **бульдо́жья мо́рда** бульдог томшоғо

**БУЛЬДО́ЗЕР** *м* бульдозер; **чи́стить доро́гу бульдо́зером** юлды бульдозер менән таҙартыу

**БУЛЬДОЗЕРИ́СТ** *м* бульдозерсы; **рабо́тать бульдозери́стом** бульдозерсы булып эшләү

**БУ́ЛЬКАНЬЕ** *с см.* **бу́лькать**; **бу́льканье воды́** һыуҙың бүлк-бүлк итеүе

**БУ́ЛЬКАТЬ** *несов.* бүлк-бүлк (бутыр-бутыр) килеү (итеү), бүлкелдәү, сылтыр-сылтыр килеү (итеү), сылтырау; **где́-то бу́лькает родни́к** ҡайҙалыр шишмә сылтыр-сылтыр килә

**БУ́ЛЬКНУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **бу́лькать** **2.** *разг.* бүлк итеп килеп төшөү (*һыуға*)

**БУЛЬО́Н** *м* һурпа; **кури́ный бульо́н** тауыҡ һурпаһы; **мясно́й бульо́н** ит һурпаһы

**БУМ I** *межд.* даң-доң; **где́-то уда́рили в ко́локол — бум, бум, бум** ҡайҙалыр даң-доң итеп саң ҡаҡтылар ♦ **ни бум-бу́м** *прост.* бер ни белмәү (аңламау)

**БУМ II** *м* **1.** бум (*сәнәғәттең һәм ауҙаның спекуляция нигеҙендә ваҡытлыса үҫеше*) **2.** *перен.*, *разг.* бум, яһалма шау-шыу, шаҡ ҡатырғыс хәбәр; **газе́тный бум** гәзиттә яҙылған шаҡ ҡатырғыс хәбәр

**БУМ III** *м* бум (*спорт ҡорамалы*); **ходи́ть по бу́му** бум буйлап атлау

**БУМА́ГА I** *ж* **1.** ҡағыҙ; **бе́лая бума́га** аҡ ҡағыҙ; **бума́га в лине́йку** юллы (буйлы) ҡағыҙ; **бума́га в кле́тку** шаҡмаҡлы ҡағыҙ; **газе́тная бума́га** гәзит ҡағыҙы; **пи́счая бума́га** яҙыу ҡағыҙы; **цветна́я бума́га** төҫлө ҡағыҙ; **заверну́ть в бума́гу** ҡағыҙға төрөү **2.** рәсми ҡағыҙ, документ (*һәр төрлө*); **предъяви́ть бума́гу** документ күрһәтеү **3.** *мн.* **бума́ги** ҡульяҙмалар; **посмотре́ть бума́ги поэ́та** шағирҙың ҡульяҙмаларын ҡарау ♦ **на бума́ге (быть, остава́ться)** ҡағыҙҙа ғына ҡалыу, тормошҡа ашмау; **це́нные бума́ги** ҡиммәтле ҡағыҙҙар (*векселдәр, облигациялар*)

**БУМА́ГА II** *ж* кизе-мамыҡ (*мамыҡ һәм унан туҡылған туҡымалар*)

**БУМАГОМАРА́НИЕ** *с*; *разг.*, *ирон.* ҡағыҙ бысратыу (*кәрәкмәгән юҡ-бар нәмә яҙыу*)

**БУМАГОМАРА́ТЕЛЬ** *м*; *разг.*, *ирон.* ҡағыҙ бысратыусы (*кәрәкмәгән юҡ-бар нәмә яҙған кеше*)

**БУМАГОПРЯДЕ́НИЕ** *с*; *уст.* кизе-мамыҡ иләү

**БУМАГОПРЯДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* кизе-мамыҡ иләү ...ы; **бумагопряди́льная фа́брика** кизе-мамыҡ иләү фабрикаһы

**БУМА́ЖКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **бума́га** I ҡағыҙ киҫәге (остоғо) **2.** рәсми ҡағыҙ, документ **3.** *разг.* ҡағыҙ аҡса; **бума́жки в три и в пять рубле́й** өслөк һәм бишлек ҡағыҙ аҡса

**БУМА́ЖНИК I** *м* бумажник (*аҡса, документ һалып, кеҫәлә йөрөтә торған янсыҡ*); **ко́жаный бума́жник** күн бумажник (янсыҡ)

**БУМА́ЖНИК II** *м* ҡағыҙсы (*ҡағыҙ сәнәғәтендә эшләүсе*)

**БУМА́ЖНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** ҡағыҙ ...ы; **бума́жная фа́брика** ҡағыҙ фабрикаһы; **бума́жное произво́дство** ҡағыҙ етештереү **2.** (*сделанный из бумаги*) ҡағыҙҙан яһалған, ҡағыҙ; **бума́жная салфе́тка** ҡағыҙ майлыҡ (салфетка) **3.** (*канцелярско-бюрократический*) ҡағыҙ эше; **бума́жная волоки́та** ҡағыҙ эше мәшәкәте ♦ **бума́жные де́ньги** ҡағыҙ аҡса; **бума́жная душа́** ҡағыҙ ҡоло, ҡағыҙ ҡорто

**БУМА́ЖНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** кизе-мамыҡ; **бума́жная ткань** кизе-мамыҡ туҡыма **2.** кизе-мамыҡтан тегелгән, кизе-мамыҡ; **бума́жное пла́тье** кизе-мамыҡтан тегелгән күлдәк

**БУМАЗЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бумазый ...ы; **бумазе́йное произво́дство** бумазый етештереү **2.** бумазый, бумазыйҙан тегелгән; **бумазе́йное пла́тье** бумазый күлдәк

**БУМАЗЕ́Я** *ж* бумазый (*бер яғы өбөрөлө мамыҡ туҡыма*); **бе́лая бумазе́я** аҡ бумазый; **пла́тье из бумазе́и** бумазыйҙан тегелгән күлдәк

**БУМЕРА́НГ** *м* бумеранг (*ырғытҡандан һуң кире әйләнеп ҡайта торған кәкре суҡмар рәүешендәге ҡорал*)

**БУНДЕСВЕ́Р** *м* бундесвер (*Германия ҡораллы көстәренең исеме*)

**БУНДЕСРА́Т** *м* бундесрат (*Германияның ер вәкиллеге органы*)

**БУНДЕСТА́Г** *м* бундестаг (*Германияның юғары вәкәләтле органы*)

**БУ́НКЕР** *м* бункер (**1.** *иген, күмер кеүек нәмәләрҙе һалып ҡуя торған үҙе бушатылмалы һауыт* **2.** *диңг. караптың рейсҡа етерлек ҡаты яғыулыҡ һаҡлай торған махсус бүлеге* **3.** *ер аҫтына эшләнгән һаҡланыу, ҡасыу урыны*)

**БУ́НКЕРНЫЙ,** -ая, -ое бункер ...ы

**БУНКЕРОВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* бункерға һалыу (тултырыу); **бункерова́ть зерно́** игенде бункерға тултырыу; **бункерова́ть у́голь** күмерҙе бункерға һалыу

**БУНКЕРОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *спец.* яғыулыҡ запасы тултыртыу (*караптарҙа, паровоздарҙа*) **2.** *страд. от* **бункерова́ть**

**БУНКЕРО́ВКА** *ж*; *спец. см.* **бункерова́ть**

**БУНКЕРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* бункерға һалыусы (тултырыусы) ...ы; **плаву́чая бункеро́вочная ба́за** бункер тултырыусы йөҙмә база

**БУНТ I** *м* (*мятеж*) бола, сыуалыш, фетнә; **вы́звать бунт** бола ҡуптарыу

**БУНТ II** *м* **1.** (*связка, кипа*) төргәк, бәйләм; **бунт про́волоки** бер бәйләм тимер сыбыҡ **2.** өйөм, өймә; **бунты́ хло́пка** мамыҡ өйөмдәре

**БУНТА́РСКИЙ,** -ая, -ое боласыл; **бунта́рские ре́чи** боласыл сығыштар

**БУНТА́РСТВО** *с* фетнәселек, боласылыҡ

**БУНТА́РЬ** *м* боласы, фетнәсе

**БУНТОВА́ТЬ** *несов.* **1.** (*участвовать в бунте*) бола сығарыу, сыуалышта ҡатнашыу **2.** (*подстрекать*) сыуалышҡа саҡырыу, болаға ҡотортоу; **бунтова́ть наро́д** халыҡты болаға ҡотортоу **3.** *перен., разг.* ҡаршы сығыу, ҡотороноу, дыу килеү; **стари́к бунту́ет** ҡарт дыу килә

**БУНТОВО́Й,** -ая, -ое (*о товаре*) төргәкле, бәйләмле, ҡаплы; **бунтово́й това́р** төргәкле тауар

**БУНТОВСКО́Й,** -ая, -ое фетнәсел, боласыл; **бунтовско́й хара́ктер** фетнәсел холоҡ

**БУНТОВЩИ́К** *м* и **БУНТОВЩИ́ЦА** *ж* боласы, бола сығарыусы, фетнәсе

**БУНЧУ́ЖНЫЙ** *м* бунчужный (*ғәскәри дәрәжә*)

**БУНЧУ́К** *м* бунчук (**1.** *украин, поляк гетмандарының, казак атамандарының һәм төрөк пашаларының хакимлыҡ билгеһен белдергән ат ҡойроғона тағылған таяҡ* **2.** *хәрби оркестрҙа музыка ҡоралы*)

**БУР I** *м* ер бырауы, бур (*ер бырауылай торған ҡорамал*)

**БУР II** *м см.* **бу́ры**

**БУРА́** *ж* бура (*натрий тоҙо*)

**БУРА́В** *м* бырау

**БУРА́ВИТЬ** *несов. что* бырауылау, бырауылап тишеү

**БУРА́ВЧИК** *м*; *уменьш. от* **бура́в** бәләкәй бырау

**БУРА́К** *м*; *обл.* сөгөлдөр

**БУРА́Н** *м* буран; **сне́жный бура́н** ҡар бураны; **весе́нний бура́н** яҙғы буран; **подня́лся бура́н** буран сыҡты

**БУРА́ННЫЙ,** -ая, -ое буранлы; **бура́нная зима́** буранлы ҡыш

**БУРГОМИ́СТР** *м* бургомистр (*ҡайһы бер Европа илдәрендә һәм элекке Рәсәйҙә ҡала идаралығы башлығы*)

**БУРДА́** *ж*; *разг.* боламыҡ (*тәмһеҙ итеп әҙерләнгән аш йәки эсемлек*)

**БУРДЮ́К** *м*; *этн.* һаба, турһыҡ, муртай (*ыҫланған мал тиреһенән тар ауыҙлы, ялпаҡ итеп тегелгән һауыт*); **налива́ть кумы́с в бурдю́к** турһыҡҡа ҡымыҙ ҡойоу; **прикрепи́ть бурдю́к к седлу́** муртайҙы эйәргә тағыу

**БУРДЮ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое һаба ...ы, турһыҡ ...ы, муртай ...ы; **бурдю́чный кумы́с** турһыҡта бешелгән ҡымыҙ

**БУРЕВЕ́СТНИК** *м* дауыл ҡошо, дауыл хәбәрсеһе, дауылғош

**БУРЕВО́Й,** -ая, -ое дауыл ...ы; **бурева́я ту́ча** дауыл болото

**БУРЕЛО́М** *с собир.* ələгет, ҡумырыҡ (*елдауыл ауҙарған ағас*); **бурело́м загроможда́л доро́гу** ҡумырыҡ юлды ҡаплаған

**БУРЕ́НИЕ** *с см.* **бури́ть**

**БУРЁНКА** *ж*; *разг.* ҡуңыр һыйыр

**БУРЕ́ТЬ** *несов.* ҡыҙғылт көрән (һоро) төҫкә инеү

**БУРЖУА́** *м нескл.* буржуа (*буржуазия синыфы вәкиле*)

**БУРЖУАЗИ́Я** *ж* буржуазия; **ме́лкая буржуази́я** ваҡ буржуазия

**БУРЖУА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое буржуаз; **буржуа́зная идеоло́гия** буржуаз идеология; **буржуа́зная па́ртия** буржуаз партия; **буржуа́зная респу́блика** буржуаз республика

**БУРЖУ́Й** *м*; *разг.*, *презр.* буржуй (*буржуазия синыфы вәкиле*)

**БУРЖУ́ЙКА** *ж* **1.** *разг.*, *презр.* буржуй ҡатын-ҡыҙ **2.** *разг.* буржуйка, тимер мейес

**БУРИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое быраулау ...ы; **бури́льная маши́на** быраулау машинаһы; **бури́льный стано́к** быраулау станогы

**БУРИ́ЛЬЩИК** *м* быраулаусы (*эшсе*)

**БУРИМЕ́** *с нескл.* буриме (*алдан бирелгән рифмалар буйынса көлкөлө шиғыр яҙыуҙан торған әҙәби уйын*)

**БУРИ́ТЬ** *несов.* *что* быраулау, ер быраулау; **бури́ть нефтяну́ю сква́жину** нефть скважинаһын быраулау

**БУ́РКА I** *ж* бурка (*Кавказ халҡының, тула һымаҡ итеп, кәзә йөнөнән баҫылған ябынсаһы*)

**БУ́РКА II** *см.* **бу́рки**

**БУ́РКАТЬ** *несов.*; *разг. от* **бу́ркнуть**

**БУ́РКИ** *мн.* (*ед.* **бу́рка** *ж*) бурка (*кейеҙ йәки фетрҙан тегелгән күн табанлы итек*); **бе́лые бу́рки** аҡ бурка

**БУ́РКНУТЬ** *сов.* *что* и *без доп.*; *разг.* мығырлау, мығырлап ҡуйыу

**БУРЛА́К** *м* бурлак (*элек карап-баржаны йылға үренә арҡан менән һөйрәүсе эшсе*)

**БУРЛА́ЦКИЙ,** -ая, -ое бурлак(тар) ...ы; **бурла́цкая жизнь** бурлактар тормошо; **бурла́цкие пе́сни** бурлак йырҙары

**БУРЛА́ЧЕСТВО** *с* бурлаклыҡ; **занима́ться бурла́чеством** бурлаклыҡ менән шөғөлләнеү

**БУРЛА́ЧИТЬ** *несов.* бурлак булып йөрөү, бурлаклыҡ итеү; **бурла́чить на Во́лге** Волгала бурлак булып йөрөү

**БУРЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** урғылып (шарлап) аға торған, урғылып (шарлап) аҡҡан; **бурли́вая река́** шарлап аҡҡан йылға; **бурли́вый пото́к** урғылып аға торған ташҡын **2.** *перен.*, *разг.* тынғы белмәгән, тынғыһыҙ, шау-шыу килгән, шаулы; **бурли́вая толпа́** шау-шыу килгән төркөм

**БУРЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** урғылыу, урғылып (шарлап) ағыу (ҡайнау); **в самова́ре бурли́т вода́** самауырҙа һыу урғылып ҡайнай **2.** *перен.*, *разг.* шау-гөр килеү, ҡайнап тороу, ҡайнашыу; **на пло́щади бурли́т толпа́** майҙанда халыҡ ҡайнай

**БУРМИ́СТР** *м* бурмистр (*крепостной хоҡуҡ заманында помещик биләмәһе менән идара иткән староста*)

**БУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дауыллы, елле-дауыллы; **бу́рная пого́да** елле-дауыллы көн **2.** ҡоторонған, ярһыу; **бу́рное мо́ре** ҡоторонған диңгеҙ **3.** *перен.* шау-гөр килгән, ҡайнап торған, шаушыулы, дауыллы; **бу́рная жизнь** ҡайнап торған тормош; **бу́рные го́ды** дауыллы йылдар **4.** *перен.* ҡайнар, ярһыулы, бик көслө; **бу́рные аплодисме́нты** көслө алҡыштар **5.** (*стремительно развивающийся*) ҡыҙыу, йылдам, етеҙ, тиҙ; **бу́рное разви́тие промы́шленности** сәнәғәттең йылдам үҫеше

**БУРОВИ́К** *м* быраулаусы, быраулау белгесе

**БУРОВО́Й,** -ая, -ое быраулау ...ы; **бурова́я сква́жина** быраулау скважинаһы; **бурово́й ма́стер** быраулау мастеры

**БУРОЗЁМ** *м* һоро тупраҡ

**БУ́РСА** *ж* бурса (*XVIII—XIX бб. дини мәктәп һәм уның дөйөм ятағы*)

**БУРСА́К** *м* бурса уҡыусыһы

**БУРСА́ЦКИЙ,** -ая, -ое бурса(лар) ...ы; **бурса́цкая жизнь** бурсалар тормошо

**БУРТ** *м* бурт; **бурты́ карто́феля** картуф бурты

**БУРТОВА́НИЕ** *с* буртҡа һалыу; **буртова́ние свёклы** сөгөлдөрҙө буртҡа һалыу

**БУРУ́Н** *м* бурун (*һыуҙың һай ерендә күбекләнеп ятҡан тулҡын*)

**БУРУНДУ́К** *м* әлгәнйәк (*кимереүсе бәләкәй урман йәнлеге*)

**БУРЧА́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *что* и *без доп.* мөңгөрләү, мығырлау, мыжыу; **бурча́ть себе́ под нос** танау аҫтынан мығырлау **2.** *безл.* бығыр-бығыр (көтөр-көтөр) килеү, бығырлау, көтөрләү (*эскә ҡарата*); **в животе́ бурчи́т** эс көтөрләй

**БУ́РЫ** *мн.* (*ед.* **бур** *м*) бурҙар (*Көньяҡ Африкаға барып урынлашҡан Европа колонистары тоҡомо*)

**БУ́РЫЙ,** -ая, -ое ҡуңыр, көрән, һоро; **бу́рый конь** көрән ат ♦ **бу́рый медве́дь** һоро айыу; **бу́рый у́голь** һоро күмер

**БУРЬЯ́Н** *м собир.* ҡарағура (*эре-торо ҡаты сүп үләне*)

**БУ́РЯ** *ж* **1.** дауыл, ғәрәсәт, ел-дауыл, буран; **разрази́лась бу́ря** дауыл ҡупты; **бу́рей повали́ло дере́вья** дауыл ағастарҙы йығып бөткән **2.** *перен.* оло бола (тауыш), шау-шыу; **поднима́ть бу́рю** оло бола ҡуптарыу **3.** *чего*; *перен.* (*сильное проявление чего-л.*) көслө; **бу́ря рукоплеска́ний** көслө алҡыштар ♦ **бу́ря в стака́не воды́** юҡбарға шау-шыу ҡуптарыу; бушҡа ҡабыҡ туҡмау; **магни́тная бу́ря** магнит дауылы

**БУРЯ́ТСКИЙ,** -ая, -ое бүрәт(тәр) ...ы, Бурятия ...ы; **буря́тский язы́к** бүрәт теле; **буря́тский наро́д** бүрәт халҡы

**БУРЯ́ТЫ** *мн.* бүрәттәр, бүрәт халҡы // *ед.* **буря́т** *м* бүрәт ир-аты; **буря́тка** *ж* бүрәт ҡатын-ҡыҙы

**БУ́СИНА** и **БУ́СИНКА** *ж* бөртөк, бер бөртөк (*мәрйен, муйынсаҡ*); **рассы́пать бу́сины** муйынсаҡ бөртөктәрен сәсеп ебәреү; **бу́синки росы́** ысыҡ бөртөгө (тамсыһы)

**БУССО́ЛЬ** *ж* буссоль (*мөйөш үлсәгес ҡорал*)

**БУ́СЫ** *мн.* муйынсаҡ, муйынса, мәрйен; **кора́лловые бу́сы** ҡыҙыл мәрйен; **янта́рные бу́сы** гәрәбә муйынсаҡ

**БУТ** *м* бут, бут ташы (*төҙөлөштә ҡулланыла торған аҡ таш*)

**БУТАФО́Р** *м* бутафор, бутафор әҙерләүсе

**БУТАФО́РИЯ** *ж*; *в разн. знач.* бутафория (*сәхнәлә йәки магазин күргәҙмәһендә ысын әйберҙәр урынында ҡулланылған яһалма йыһаздар һәм әйберҙәр*)

**БУТАФО́РНЫЙ,** -ая, -ое бутафория ...ы

**БУТАФО́РСКИЙ,** -ая, -ое **1.** бутафория ...ы; **бутафо́рские предме́ты** бутафория нәмәләре (әйберҙәре) **2.** *перен.* яһалма, яһап алынған, ысын түгел

**БУТЕРБРО́Д** *м* бутерброд; **бутербро́д с сы́ром** сырлы бутерброд; **бутербро́д с ма́слом** майлы бутерброд

**БУТИРО́МЕТР** *м* бутирометр (*һөттөң ҡуйылығын билдәләй торған прибор*)

**БУТИ́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* бут түшәү (һалыу); **бути́ть котлова́н** котлованға бут түшәү

**БУ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое бут түшәлгән (һалынған)

**БУТО́Н** *м* сәскә бөрөһө (төймәһе); **буто́н ро́зы** роза бөрөһө

**БУ́ТСЫ** *мн.* (*ед.* **бу́тса** *ж*); *спорт.* бутсы (*футбол уйнағанда кейелгән махсус ботинка*)

**БУТУ́З** *м*; *разг.* бүкән, лупыш (*балаға ҡарата*)

**БУТЫ́ЛКА** *ж* бутылка, шешә; **буты́лка молока́** бер шешә һөт

**БУТЫ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бутылка ...ы, шешә ...ы; **буты́лочное стекло́** бутылка быялаһы **2.** бутылкалы, шешәле; **буты́лочное молоко́** шешәле һөт ♦ **буты́лочный цвет** ҡара йәшел төҫ

**БУТЫ́ЛЬ** *ж* ҙур шешә

**БУ́ФЕР** *м* буфер (*бәрелеү көсөн йомшартыу өсөн махсус ҡоролма*); **ваго́нный бу́фер** вагон буферы; **служи́ть бу́фером** *перен.* буфер хеҙмәтен башҡарыу

**БУ́ФЕРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** буфер ...ы; **бу́ферный брус** буфер бурсаһы **2.** *перен.* буфер; **бу́ферное госуда́рство** буфер дәүләт (*дошман яҡтарҙың бәрелешен айырып, уртала ятҡан дәүләт*)

**БУФЕ́Т** *м* буфет (**1.** *һауыт-һаба, эсемлек ҡуя торған шкаф* **2.** *ваҡ-төйәк ашамлыҡ, эсемлек һата торған урын*)

**БУФЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое буфет ...ы; **буфе́тный стол** буфет өҫтәле

**БУФЕ́ТЧИК** *м* и **БУФЕ́ТЧИЦА** *ж* буфетсы

**БУФФ** *прил. неизм.* көлкө, мәрәкә, комик; **теа́тр-буфф** комик театр

**БУФФО́Н** *м* буффон (*оперетталарҙа, водевилдәрҙә көлкөлө ролдәр башҡарған актёр*)

**БУФФОНА́ДА** *ж* буффонада (*көлкөлө тамаша*)

**БУФФО́НСТВО** *с* мәрәкәселлек, кәмитселек

**БУ́ФЫ** *мн.* буф (*ҡатын-ҡыҙ күлдәгендә матурлыҡ өсөн ҡабартып тегелгән бөрмәләр*); **пла́тье с бу́фами на плеча́х** ҡулбашына буф тотолған күлдәк

**БУХ** *межд. в знач. сказ.* дөп, шап, шарт, шаҡ, гөрҫ, дөңк; **он бух в во́ду** ул һыуға шап (итеп барып төштө)

**БУХА́НКА** *ж* буханка (*икмәк*); **буха́нка хле́ба** бер буханка икмәк

**БУ́ХАТЬ** *несов. см.* **бу́хнуть** I

**БУ́ХАТЬСЯ** *несов. см.* **бу́хнуться**

**БУХГА́ЛТЕР** *м* бухгалтер; **гла́вный бухга́лтер** баш бухгалтер; **рабо́тать бухга́лтером** бухгалтер булып эшләү

**БУХГАЛТЕ́РИЯ** *ж* бухгалтерия

**БУХГА́ЛТЕРСКИЙ,** -ая, -ое **1.** бухгалтер ...ы; **бухга́лтерская до́лжность** бухгалтер вазифаһы **2.** бухгалтерия ...ы; **бухга́лтерский учёт** бухгалтерия иҫәбе

**БУ́ХНУТЬ I** *сов.*; *разг.* **1.** дөпөлдәү, гөрҫөлдәү, дөңкөлдәү, дөп (гөрҫ, дөңк) итеп ҡалыу; **пу́шка бу́хнула** туп гөрҫ итеп ҡалды **2.** *что* и *без доп.* шап иттереп бәреү (һуғыу, ырғытыу); **бу́хнуть на́ пол вяза́нку дров** бер ҡосаҡ утынды шап иттереп иҙәнгә ырғытыу **3.** *что* и *без доп.*; *перен.* ҡәтғи итеп (бәреп) әйтеү; **бу́хнуть в лицо́** йөҙөнә бәреп әйтеү

**БУ́ХНУТЬ II** *несов.* бүртеү, бүртенеү, шешенеү; **доска́ бу́хнет от сы́рости** таҡта дымға шешенә

**БУ́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шап (лап, гөрҫ, дөңк) итеп барып төшөү; **он бу́хнулся в во́ду** ул һыуға шап итеп барып төштө

**БУ́ХТА I** *ж* бухта (*ел-дауылдан ышыҡланған диңгеҙ ҡултығы*)

**БУ́ХТА II** *ж* бухта (*уралған канат түңәрәге*)

**БУ́ХТЫ-БАРА́ХТЫ: с бу́хты-бара́хты** *прост.* айышына төшөнмәй, уны-быны уйлап тормай, уйлап-нитеп тормаҫтан

**БУ́ЧА** *ж*; *прост.* ыҙғыш-талаш, бола, тауыш, шау-шыу, ғауға; **подня́ть бу́чу** шау-шыу ҡуптарыу

**БУ́ЧЕНИЕ** *с см.* **бу́чить**

**БУ́ЧИТЬ** *несов. что* **1.** һелтегә һалып ҡайнатыу; **бу́чить бельё** керҙе ҡайнатыу **2.** ирәкләү (*иләү алдынан тирене махсус әҙерләнгән шыйыҡсаға һалып әсетеү*); **бу́чить ко́жу** тирене ирәкләү

**БУШЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡотороу, ҡотороноу; **мо́ре бушу́ет** диңгеҙ ҡоторона **2.** *перен.*, *разг.* ярһыу, ташып барыу (тороу); **в нём бушева́ла ра́дость** унын шатлығы ташып тора ине **3.** *разг.* ҡотороноу, шашыу, дыу (тауыш, ғауға) ҡуптарыу

**БУ́ШЕЛЬ** *м* бушель (*бөртөклө нәмәләрҙе үлсәү берәмеге — Англияла 36,368 л, АҠШ-та 35,238 л*); **бу́шель пшени́цы** бер бушель бойҙай

**БУШЛА́Т** *м* бушлат; **матро́сский бушла́т** матрос бушлаты

**БУЯ́Н** *м* янъял (бола) сығарыусы, дау (тауыш, ғауға) ҡуптарыусы, янъялсы, боласы, ғауғасы, һуғыш суҡмары

**БУЯ́НИТЬ** *несов.* янъял (бола) сығарыу, дау (тауыш, ғауға) ҡуптарыу

**БЫ** и **Б** *частица* **1.** (*в знач. предположительной возможности*) булһа, -ар/-әр ине, -р ине; **жил бы он, не зна́я забо́ты** ул бер ҡайғыһыҙ йәшәр ине; **я бы пое́хал** мин булһам, барыр инем **2.** (*в знач. пожелания*) -һаң/-һәң ине, -рға/-рғә ине; **почита́ть бы немно́го** әҙ генә уҡып алырға ине; **одни́м бы глазко́м погляде́ть** бер генә күреп ҡалырға ине **3.** (*в знач. просьбы*) -һаңсы/-һәңсе, -һағыҙсы/-һәгеҙсе, инегеҙ; **сходи́ть бы тебе́ к врачу́** врачҡа барып килер инең; **отдохну́ли бы вы немно́го** әҙерәк ял итеп алыр инегеҙ ♦ **бу́дто бы** әйтерһең дә, гүйә

**БЫВА́ЛО** *частица в знач. вводн. сл.* торғайны, була торғайны, булған саҡтар бар ине, булғылай ине, -р ине; **в мо́лодости, быва́ло, мы с ним пе́ли** йәшлектә беҙ унын менән бергә йырлай торғайныҡ; **ся́дет, быва́ло, и начина́ет что́-нибудь расска́зывать** ултырыр ҙа берәй нәмә һөйләй башлар ине

**БЫВА́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* күпте күргән (белгән), донъя күргән, тәжрибәле, шымарған; **он челове́к быва́лый** ул күпте күргән кеше

**БЫВА́ТЬ** *несов.* **1.** *в разн. знач.* булыу; **роди́тельское собра́ние быва́ет раз в ме́сяц** ата-әсәләр йыйылышы айына бер тапҡыр була; **мы ча́сто быва́ем в теа́тре** беҙ театрҙа йыш ҡына булабыҙ **2.** булғылау; **быва́ют стра́нные слу́чаи** ғәжәп хәлдәр булғылай ♦ **как не быва́ло** әҫәре лә (эҙе лә) ҡалманы, булмаған (да) кеүек; **как ни в чём не быва́ло** бер нәмә лә булмаған кеүек (шикелле), бер нәмә лә булмағандай, һис тә иҫ китмәй генә

**БЫ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **быть 2.** *прил.* элекке; **бы́вший президе́нт** элекке президент

**БЫК** *м* үгеҙ; **племенно́й бык** тоҡом үгеҙе ♦ **брать быка́ за рога́** үгеҙҙе мөгөҙөнән алыу; **здоро́в как бык** үгеҙ кеүек таҙа; **упёрся как бык** үгеҙ кеүек үсекте (киреләнде)

**БЫКИ́** *мн.* (*ед.* **бык** *м*) күпер бағаналары

**БЫЛИ́НА** *ж* былина (*батырҙар тураһында урыҫ халҡының эпик йыры*)

**БЫЛИ́НКА** *ж* үлән һабағы

**БЫЛИ́ННЫЙ,** -ая, -ое былина ...ы; **были́нный сюже́т** былина сюжеты

**БЫЛИ́НЩИК** *м* былина йырлаусы

**БЫЛО** *частица* -ған/-гән ине, ғына/генә тигәндә, -ғас/-гәс; **я было совсе́м собра́лся идти́, да разду́мал** мин барырға йыйынып бөткәс, кире уйланым; **он чу́ть было не упа́л** ул саҡ ҡолап китмәне

**БЫЛО́Й,** -ая, -ое **1.** үткән, булған, элекке, бороңғо; **в былы́е го́ды** үткән йылдарҙа **2.** *в знач. сущ.* **было́е** *с* үткән; **вспо́мнить было́е** үткәнде иҫкә төшөрөү

**БЫЛЬ** *ж* **1.** булған хәл, эш, ваҡиға, үткән хәл, эш, ваҡиға; **он лю́бит вспомина́ть бы́ли пре́жних лет** ул үткән хәл-ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөргә ярата **2.** *лит.* хикәйә, (*ысын ваҡиға тураһындағы ҙур булмаған әҫәр*)

**БЫЛЬЁ** *с собир.*; *уст.* үлән ♦ **быльём поросло́** булған да бөткән; мәңгегә (күптән) онотолған, булыры булған, буяуы уңған

**БЫСТРИНА́** *ж* шаршы, һеүән; **ло́дка вы́шла на быстрину́** кәмә шаршыға килеп сыҡты

**БЫСТРОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое йылғыр (йүгерек) күҙле; **быстрогла́зый челове́к** йүгерек күҙле кеше

**БЫСТРОНО́ГИЙ,** -ая, -ое йүгерек, елаяҡ, шәп юртҡан, юртаҡ (*атҡа ҡарата*); **быстроно́гий конь** юртаҡ ат; **быстроно́гий ма́льчик** йүгерек малай

**БЫСТРОРАСТВОРИ́МЫЙ,** -ая, -ое тиҙ иреүсән, тиҙ ирей торған; **быстрораствори́мый са́хар** тиҙ ирей торған шәкәр; **быстрораствори́мый ко́фе** тиҙ ирей торған ҡәһүә

**БЫСТРОТА́** *ж* тиҙлек, шәплек, ҡыҙыулыҡ, йылдамлыҡ, етеҙлек; **с быстрото́й мо́лнии** йәшен тиҙлегендә; **мча́ться с необыча́йной быстрото́й** ғәжәп ҙур тиҙлектә елеү

**БЫСТРОТЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (һиҙҙермәй) тиҙ генә үткән; **быстроте́чное вре́мя** һиҙҙермәй үткән ваҡыт

**БЫСТРОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое тиҙ (шәп) йөрөшлө, тиҙ (шәп) йөрөй торған; **быстрохо́дный комба́йн** тиҙ йөрөшлө комбайн

**БЫ́СТРЫЙ,** -ая, -ое **1.** шәп, тиҙ, йор; **бы́стрый шаг** шәп аҙым; **бы́страя река́** йор йылға **2.** етеҙ, ҡыйғыр, елгер, йылдам, оҫҡор, ҡыйғыр, сос; **бы́стрый конь** оҫҡор ат; **бы́стрый со́кол** ҡыйғыр ыласын; **бы́стрые кры́лья** елгер ҡанат **3.** бик тиҙ, йылдам; **бы́стрый рост се́льского хозя́йства** ауыл хужалығының йылдам үҫеүе **4.** (*беглый*) еңел, тиҙ, йүгерек; **бы́стрый взгляд** йүгерек ҡараш; **бы́строе чте́ние** тиҙ уҡыу

**БЫТ** *м* тормош, көндәлек тормош, көнкүреш; **дома́шний быт** йорттағы көнкүреш

**БЫТИЕ́** *с* **1.** *филос.* ысынбарлыҡ, йәшәү рәүеше, йәшәйеш; **бытие́ определя́ет созна́ние** йәшәйеш аңды билдәләй **2.** (*жизнь*) тормош, көнкүреш, йәшәү

**БЫ́ТНОСТЬ:** **в бы́тность** сағында, булған ваҡытта; **в бы́тность мою́ студе́нтом** студент булған сағымда, мин студент булған ваҡытта

**БЫТОВА́НИЕ** *с см.* **бытова́ть**; **бытова́ние стари́нных пе́сен** боронғо йырҙарҙың йәшәп килеүе

**БЫТОВА́ТЬ** *несов.* йәшәү, йәшәп килеү, булыу, бар булыу; **посло́вицы быту́ют в наро́де** мәҡәлдәр халыҡ араһында йәшәп килә

**БЫТОВИ́ЗМ** *м* көнкүреште һүрәтләү

**БЫТОВИ́К** *м*; *разг.* **1.** *см.* **бытописа́тель** 2; **2.** көнкүреш хеҙмәте хеҙмәткәре

**БЫТОВО́Й,** -ая, -ое тормош ...ы, көндәлек тормош ...ы, көнкүреш ...ы; **бытовы́е усло́вия** көнкүреш шарттары

**БЫТОПИСА́НИЕ** *с*; *уст.* көнкүреште һүрәтләү

**БЫТОПИСА́ТЕЛЬ** *м* **1.** көнкүреште (көндәлек тормошто) һүрәтләгән яҙыусы, рәссам **2.** *уст.* тарихсы, тауарихсы

**БЫТЬ** *несов.* **1.** (*существовать, иметься*) булыу, бар булыу; **у него́ был сын** уның улы бар ине; **малыши́ бы́ли в де́тском саду́** сабыйҙар балалар баҡсаһында ине **2.** (*находиться, присутствовать*) булыу; **днём я бу́ду на рабо́те** көндөҙ мин эштә булам **3.** (*происходить, случаться*) булыу; **вчера́ был си́льный урага́н** кисә көслө дауыл булды **4.** (*приходить, приезжать*) килеү, килеп етеү, булыу; **он и сам ско́ро бу́дет** ул үҙе лә тиҙҙән килеп етер **5.** *в знач. вспомогательного гл.*: а) (*в значении связки между подлежащим и сказуемым*) булыу, ине; **оте́ц был учи́телем** атаһы уҡытыусы ине; **моя́ ма́ма была́ врачо́м** әсәйем врач булған; б) (*для образования сложных форм страдательного залога*) булған, ине; **сад был поса́жен шко́льниками** баҡса уҡыусылар тарафынан ултыртылған булған; в) (*для образования глагола будущего времени изъявительного наклонения*) -ыр/-ер, -асаҡ/-әсәк; **он бу́дет игра́ть на скри́пке** ул скрипкала уйнаясаҡ ♦ **будь что бу́дет** ни булһа ла булыр; ни булһа, шул булыр; **была́ не была́** булһа — булыр, булмаһа — юҡ; бөткән баш бөткән; **быть заодно́** *с кем* бер һүҙҙә булыу; **как быть?** ни эшләргә?, нисек итергә инде?; **так и быть** ярай улай булғас; әйҙә, шулай булһын; ярар, шулай булһын (*килешеүҙе белдергәндә*)

**БЫТЬЁ** *с* көнкүреш, көндәлек тормош

**БЫЧА́ТИНА** *ж* үгеҙ ите

**БЫЧА́ЧИЙ** и **БЫ́ЧИЙ,** -ья, -ье үгеҙ ...ы; **бы́чья ко́жа** үгеҙ тиреһе; **бы́чий рог** үгеҙ мөгөҙө

**БЫЧИ́НА** *ж* үгеҙ тиреһе

**БЫЧО́К I** *м*; *уменьш.-ласк. от* **бык**; үгеҙ быҙау, йәш үгеҙ

**БЫЧО́К II** *м* (*рыба*) ташбаш, үгеҙбалыҡ

**БЬЕФ** *м*; *гидротех.* бьеф (*йылғаның йәки каналдың плотинанан, шлюздан өҫкө* (*аҫҡы*) *участогы*)

**БЮВА́Р** *м* бювар (*конверт һәм башҡа ҡағыҙҙар һалып йөрөтөлә торған папка*); **положи́ть бума́ги в бюва́р** ҡағыҙҙарҙы бюварға һалыу

**БЮВА́РНЫЙ,** -ая, -ое бювар(ҙағы), бювар ...ы; **бюва́рная бума́га** бювар ҡағыҙы

**БЮДЖЕ́Т** *м* бюджет; **госуда́рственный бюдже́т** дәүләт бюджеты; **годово́й бюдже́т** йыллыҡ бюджет; **ли́чный бюдже́т** шәхси бюджет ♦ **вы́йти из бюдже́та** тейешенән артыҡ тотоноу (*аҡсаны*)

**БЮДЖЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое бюджет ...ы; **бюдже́тный год** бюджет йылы; **бюдже́тная коми́ссия** бюджет комиссияһы

**БЮЛЛЕТЕ́НЬ** *м* бюллетень (**1.** *ижтимағи әһәмиәткә эйә булған төрлө эш, мәсьәлә тураһында ҡыҫҡаса рәсми белдереү* **2.** *берәй ойошма сығарған ваҡытлы баҫманың исеме* **3.** *депутатлыҡҡа кандидат кешенең исеме күрһәтелгән һайлау ҡағыҙы* **4.** *ауырыу кешенең ваҡытлыса эштән бушатылыуы тураһында ҡағыҙ*)

**БЮРО́ I** *с нескл.* бюро (**1.** *ҡайһы бер ойошмаларҙың етәкселек итеү йәки күрһәтмә биреү бүлеге һәм шул бүлектең ултырышы* **2.** *ҡайһы бер ойошманың йәки бүлектең исеме*)

**БЮРО́ II** *с нескл.* бюро (*яҙыу өҫтәленең бер төрө*); **укра́шенное резьбо́й бюро́** семәрләп биҙәлгән бюро

**БЮРОКРА́Т** *м* бюрократ (*хеҙмәт вазифаһын, асылына төшмәй, формаль рәүештә генә башҡара торған кеше*)

**БЮРОКРАТИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **бюрократизи́ровать**

**БЮРОКРАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* бюрократлаштырыу; **бюрократизи́ровать госуда́рственный аппара́т** дәүләт аппаратын бюрократлаштырыу

**БЮРОКРАТИ́ЗМ** *м* бюрократлыҡ (**1.** *халыҡ мәнфәғәтен иҫәпкә алмай, иҙеүселәр синыфы ихтыяжын ғына күҙәткән дәүләт идараһы* **2.** *мәсьәләнең асылына инмәй, формаль яғын ғына өҫтөн ҡуйып эшләү ысулы*)

**БЮРОКРАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое бюрократик; **бюрократи́ческий строй** бюрократик ҡоролош; **бюрократи́ческое отноше́ние к де́лу** эшкә бюрократтарса мөнәсәбәт (ҡараш)

**БЮРОКРА́ТИЯ** *ж* **1.** бюрократлыҡ; **громи́ть бюрокра́тию** бюрократлыҡты ҡыйратыу **2.** *собир.* бюрократтар, чиновниктар

**БЮСТ** *м* **1.** бюст (*кеше кәүҙәһенең билдән йәки күкрәктән юғары өлөшөн генә һүрәтләгән скульптура*); **бюст Салава́та Юла́ева** Салауат Юлаев бюсы **2.** бюст, күкрәк (*ҡатын-ҡыҙға ҡарата*)

**БЮСТГА́ЛЬТЕР** *м* бюстгальтер, күкрәксә (*ҡатын-ҡыҙҙың түшен йыйнаҡ итеп тота торған махсус эске кейем*); **атла́сный бюстга́льтер** атлас бюстгальтер

**БЯ́ЗЕВЫЙ,** -ая, -ое бәз, бәздән тегелгән; **бя́зевая руба́шка** бәз күлдәк

**БЯЗЬ** *ж* бәз (*арзанлы йоҡа кизе-мамыҡ туҡыма*); **бе́лая бязь** аҡ бәз

**БЯ́КА** *ж*; *разг., дет.* кәкәй, бысраҡ (насар) нәмә

# В

**В** и **ВО** *предлог* **1.** *с вин. п.* (*при обозначении направления и места*) -ға/-гә; **войти́ в дом** өйгә инеү; **е́хать в го́род** ҡалаға барыу; **положи́ть в стол** өҫтәл тартмаһына һалыу

**2.** *с вин. п.* (*при обозначении какой-л. группы, разряда лиц, предметов, в состав которых кто-что-л. включается*) -ға/-гә, -лыҡҡа/-леккә; **пойти́ в агроно́мы** агрономлыҡҡа уҡырға барыу; **кандида́т в депута́ты** депутатлыҡҡа кандидат

**3.** *с вин. п.* (*при обозначении занятия, состояния, в которые кто-л. вовлекается*) -ға/-гә, менән; **углуби́ться в чте́ние** уҡыуға бирелеү, уҡыу менән мауығыу; **погрузи́ться в размышле́ния** уйға батыу; **уйти́ в рабо́ту** эшкә сумыу

**4.** *с вин. п.* (*при обозначении предмета, через который совершается действие*) -дан/-дән (аша); **смотре́ть в бино́кль** бинокль аша ҡарау; **смотре́ть в окно́** тәҙрәнән ҡарау

**5.** *с вин. п.* (*при обозначении предмета, в который что-л. заключается, облекается*) -ға/-гә; **заку́таться в пухо́вый плато́к** дебет шәлгә ураныу; **заверну́ть в бума́гу** ҡағыҙға төрөү

**6.** *с вин. п.* (*при обозначении предмета, места и т.п., на поверхность которого направлено действие*) -ға/-гә, -дан/-дән; **стук в дверь** ишек шаҡыу; **уда́рить в спи́ну** арҡаға һуғыу; **целова́ть в гу́бы** ирендән үбеү

**7.** *с вин. п.* (*при обозначении изменения вида, состояния*) -ға/-гә; **преврати́ть в пар** парға (быуға) әйләндереү; **изорва́ть в кло́чья** киҫәктәргә өҙгөләү; **разверну́ться в цепь** *воен.* цепҡа таралыу; **сжа́ться в комо́к** йомарланыу, йомғаҡҡа әүерелеү

**8.** *с вин. п.* (*при указании цели действия; соответствует предлогам "ради", "для" и предложным сочетаниям "в качестве", "в виде"*) өсөн, хаҡына, -ға/-гә, -ып/-еп йөҙөнән; **сказа́ть в шу́тку** шаяртып әйтеү; **взять в приме́р** миҫалға алыу, миҫал өсөн; **привести́ в доказа́тельство** иҫбатлау өсөн (йөҙөнән) килтереү, иҫбатлап

**9.** *с вин. п.* (*при указании на сходство*) оҡшаш, тап, тас; **хара́ктером в отца́** холҡо менән тас атаһы, холҡо менән атаһы, атас; **де́вочка вся в мать** ҡыҙ тас әсәһе, ҡыҙ әсәһенә оҡшаш, инәс

**10.** *с вин. п.* (*при указании на кратность соотношений*) тапҡыр, ҡабат, мәртәбә; **в де́сять раз бо́льше** ун тапҡыр ҙурыраҡ; **в два ра́за длинне́е** ике мәртәбә оҙонораҡ

**11.** *с вин. п.* (*при обозначении внешнего признака, свойства, качества и количественного признака*) -лы/-ле, -лыҡ/-лек; **тетра́дь в кле́тку** шаҡмаҡлы дәфтәр; **ко́мната в два́дцать квадра́тных ме́тров** егерме квадрат метрлы бүлмә; **ве́сом в одну́ то́нну** бер тонналы, бер тонналыҡ; **ценой в три рубля́** хаҡы өс һумлыҡ

**12.** *с предл. п.* (*при обозначении местонахождения*) -да/-дә, -ла/-лә, -ҙа/-ҙә, -та/-тә; **жить в Уфе́** Өфөлә йәшәү; **учи́ться в шко́ле** мәктәптә уҡыу; **кни́ги лежа́т в шкафу́** китаптар шкафта ята; **стоя́ть в снегу́** ҡарҙа баҫып тороу

**13.** *с предл. п.* (*при обозначении лица, предмета, явления и т.п., в котором содержится, обнаруживается или отсутствует что-л.*) -да/-дә; **в рома́не три ча́сти** романда өс бүлек; **в году́ 365 дней** бер йылда 365 көн

**14.** *с предл. п.* (*при обозначении предмета, который находится на ком-чём-л.*) -лы/-ле, менән; **ме́бель в чехла́х** көплө мебель; **челове́к в очка́х** күҙлекле кеше; **в бе́лом шёлковом пла́тье** аҡ ебәк күлдәктән, аҡ ебәк күлдәктә; **ру́ки в кра́ске** ҡулдары буяулы; **ходи́ть в сапога́х** итек менән йөрөү, итек кейеп йөрөү

**15.** *с предл. п.* (*при указании состояния, в котором кто-что-л. находится, а также состояния, которое сопровождает или вызывает какое-л. действие, движение*) -да/-дә хәлдә булыу; **быть в у́жасе** ҡот оскос (ҡурҡыныс) хәлдә булыу; **ви́шня вся в цвету́** сейә шау сәскәлә ултыра

**16.** *с предл. п.* (*при указании на вид и форму предмета*) -ған/-гән, -дағы/-дәге, менән; **зо́лото в сли́тках** ҡойолма (ҡойолған) алтын; **во́лосы в завитка́х** бөҙрәләнгән сәс; **костю́м в англи́йском сти́ле** инглиз стилендәге костюм

**17.** *с предл. п.* (*при обозначении расстояния*) алыҫлыҡта, тирәһе, ерҙә; **в пяти́ киломе́трах от дере́вни** ауылдан биш километр алыҫлыҡта; **в двух шага́х** ике аҙым тирәһе

**18.** *с вин.* и *предл. п.* (*при обозначении времени*) -да/-дә; **прийти́ в пя́тницу** йомаға (йома көндө) килергә; **заня́тия начина́ются в де́вять часо́в** дәрестәр сәғәт туғыҙҙа башлана; **в про́шлом году́** үткән йылда; **в сре́ду** шаршамбыла; **в мо́лодости** йәшлектә ♦ **в ка́честве** сифатында; **в конце́ концо́в** һуңғы (аҙаҡҡы) сиктә; **в насме́шку** көлкө өсөн, ҡыҙыҡ өсөн; **в слу́чае, е́сли** әгәр; әгәр була ҡалһа; **в том числе́** шул иҫәптән; **в тече́ние** эсендә, ваҡыт эсендә; **сло́во в сло́во** һүҙмә-һүҙ

**В...** (**во...**, **въ...**) *приставка* (*ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: 1) *эш-хәрәкәттең эскә ҡарай йүнәлгәнен, мәҫ.*, **вбежа́ть** йүгереп килеп инеү; **влете́ть** осоп килеп инеү; **вбить** һуғып (ҡағып) индереү; 2) *эш-*

*хәрәкәттең башҡарыусы тарафынан эскә йүнәлтелгәнен*: **вдохну́ть** тынды эскә тартыу, эскә алыу; **всоса́ть** һурыу; **впита́ть** һеңдереү, үҙенә тартыу (һурыу); 3) *“на” предлогы менән эш-хәрәкәттең юғарыға табан йүнәлгәнен*: **вбежа́ть на** йүгереп меneү; 4) *эш-хәрәкәттең тәрәнлеген, тәьҫирлеген*: **вду́маться** ентекләп (төптән) уйлау, төбөнә (айышына) төшөнөү; **всмотре́ться** текләү, төбәлеп ҡарау)

**ВА-БА́НК** *нареч.* ва-банк, тотош аҡса (*кәрт уйынындағы банкыла тотолған бөтә аҡса*); **игра́ть ва-ба́нк** тотош аҡсаға уйнау ♦ **идти́ ва-ба́нк** тәүәккәл (ҡыйыу) эш итеү, тәүәккәлләү

**ВА́БИК** *м*; *охот.* вабик (*ҡоштарҙы алдап саҡырыу өсөн ҡулланылған махсус һыҙғыртҡыс йәки шаҡылдауыҡ*)

**ВА́БИЛЬЩИК** *м*; *охот.* вабильщик (*коштарҙы алдатҡыс менән саҡырыусы*)

**ВА́БИТЬ** *несов. кого*; *охот.* һыҙғыртҡыс менән саҡырыу (*ҡоштарҙы һыҙғыртҡыс, шаҡылдауыҡ менән алдап саҡырыу*)

**ВАВИЛО́НСКИЙ: вавило́нское столпотворе́ние** мәхшәр, ҡиәмәт көнө

**ВА́ГА** *ж* **1.** *тех.*, *уст.* вага, ҙур үлсәү (*бик ҙур, ауыр нәмәне үлсәй торған ҡорамал*) **2.** һалмауыр (*ауыр нәмәләрҙе күтәртеү өсөн ҡулланыла*)

**ВАГО́Н** *м* **1.** вагон; **бага́жный ваго́н** багаж вагоны; **жёсткий ваго́н** ҡаты вагон; **мя́гкий ваго́н** йомшаҡ вагон **2.** (*количество груза*) вагон (*миҡдар берәмеге, йәғни вагондың һыйҙырышлығы*); **ваго́н угля́** бер вагон күмер **3.** *перен.*, *прост.* бик күп (һүҙ); **ваго́н новосте́й** бик күп хәбәр

**ВАГОНЕ́ТКА** *ж* вагонетка, вагонсыҡ (*тар рельс буйлап йөк ташый торған асыҡ бәләкәй вагон-арба*); **ша́хтная вагоне́тка** шахта вагонеткаһы

**ВАГОНЕ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое вагонеткалы; **вагоне́точный соста́в** вагонеткалы состав

**ВАГОНЕ́ТЧИК** *м* вагонетка йөрөтөүсе

**ВАГО́ННИК** *м* вагонсы (*вагон эшләү заводының йәки вагон паркының эшсеһе*)

**ВАГО́ННЫЙ,** -ая, -ое вагон(дар) ...ы; **ваго́нные о́кна** вагон тәҙрәләре

**ВАГОНОВОЖА́ТЫЙ** *м* и **ВАГОНОВОЖА́ТАЯ** *ж* трамвай йөрөтөүсе, трамвайсы

**ВАГОНООПРОКИ́ДЫВАТЕЛЬ** *м* вагон бушатҡыс

**ВАГОНОРЕМО́НТНЫЙ,** -ая, -ое вагон йүнәтеү ...ы, вагондар йүнәтә торған; **вагоноремо́нтные мастерски́е** вагон йүнәтеү оҫтаханаһы

**ВАГОНОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое вагон(дар) ...ы, вагондар эшләү ...ы, вагон(дар) эшләй торған; **вагоностро́ительный заво́д** вагондар эшләү заводы

**ВАГО́НЧИК** *м* **1.** *уменьш. от* **ваго́н 2.** вагонсыҡ, ялан вагоны (*яланда эшләүселәргә тәғәйенләнгән күсмә вагон-өй*)

**ВАГРА́НКА** *ж*; *тех.* вагранка (*суйын һәм төҫлө металдар иретеү, шулай уҡ төрлө материалдар яндыра торған шахта мейесе*)

**ВАГРА́НЩИК** *м* вагранкасы (*вагранканы хеҙмәтләндереүсе эшсе*)

**ВА́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* эреләнеү, эре ҡыланыу, кәпәренеү, ҡуҡрайыу; **ва́жничать пе́ред друзья́ми** дуҫтар алдында эре ҡыланыу

**ВА́ЖНО 1.** *нареч.* эре, ҡупым; **ва́жно держа́ть себя́** үҙеңде эре тотоу **2.** *в знач. сказ.* мөһим, әһәмиәтле, кәрәк; **э́то о́чень ва́жно** был бик мөһим; **э́то ва́жно бы́ло знать** быны белеү кәрәк ине

**ВА́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** (*значительность, значимость*) мөһимлек, әһәмиәтлелек, әһәмиәт; **ва́жность вопро́са** мәсьәләнең мөһимлеге; **дела́ госуда́рственной ва́жности** дәүләт әһәмиәтендәге эштәр **2.** (*надменность*) тәкәбберлек, эрелек, тәкәббер, эре; **напуска́ть на себя́ ва́жность** тәкәббер төҫ алыу ♦ **велика́ ва́жность**; **э́ка ва́жность**; **не велика́ ва́жность** бик иҫ китерлек түгел, иҫең киткән икән иҫке сәкмәнгә

**ВА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мөһим, әһәмиәтле, кәрәкле; **ва́жный вопро́с** мөһим мәсьәлә; **ва́жное откры́тие** әһәмиәтле асыш **2.** *разг.* ҙур, ҙур дәрәжәле; **ва́жная персо́на** ҙур дәрәжәле кеше; **ва́жное лицо́** ҙур кеше **3.** эре, тәкәббер, ғорур; **ва́жный вид** эре ҡиәфәт **4.** *прост.* (*хороший по качеству, отличный*) яҡшы, һәйбәт, яҡшы сифатлы

**ВА́ЗА** *ж* ваза, һауыт; **ва́за для цвето́в** сәскә вазаһы

**ВАЗЕЛИ́Н** *м* вазелин; **техни́ческий вазели́н** техник вазелин

**ВАЗЕЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое вазелин, вазелин ...ы, вазелинлы, вазелин ҡушылған; **вазели́новое произво́дство** вазелин етештереү; **вазели́новое мы́ло** вазелинлы һабын

**ВАЗО́Н** *м* вазон, гөл һауыты

**ВА́ЗОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **ва́за**

**ВА́ЙЯ** *ж*; *бот.* вайя (*абаға япрағы*)

**ВАКА́НСИЯ** *ж* вакансия, буш урын (*учреждение штатындағы, уҡыу йортондағы һ.б. буш урын*); **у нас есть вака́нсия** беҙҙә вакансия бар

**ВАКА́НТНЫЙ,** -ая, -ое вакант(лы), буш; **вака́нтное ме́сто** буш урын; **вака́нтная до́лжность** вакантлы вазифа

**ВА́КСА** *ж* вакса (*аяҡ кейеме кремы*)

**ВА́КСИТЬ** *несов. что*; *разг.* ваксалау, майлау; **ва́ксить сапоги́** итектәрҙе ваксалау

**ВАКУО́ЛИ** *мн.* (*ед.* **вакуо́ля** *ж*); *физиол.* вакуоли (*хайуан һәм үҫемлек күҙәнәктәрендә кескәй шар формаһындағы аш һеңдереү һәм бүлеп сығарыу ҡыуыҡсаһы*)

**ВА́КУУМ** *м*; *физ.*, *тех.* вакуум, бушлыҡ (*бөтәш һауыт эсендәге баҫымы һауаныҡынан түбән газ*)

**ВАКУУММЕ́ТР** *м* вакуум үлсәгес

**ВА́КУУМ-НАСО́С** *м* вакуум-насос (*вакуум барлыҡҡа килтереү өсөн газ ҡыуҙырыу ҡорамалы*)

**ВА́КУУМНЫЙ,** -ая, -ое *физ.*, *тех.* вакуум ...ы, вакуумлы; **ва́куумная ла́мпа** вакуумлы лампа; **ва́куумная те́хника** вакуум техникаһы

**ВАКФ** и **ВАКУ́Ф** *м* ваҡыф (*дин буйынса хөкүмәт йәки айырым кешеләр тарафынан диндарҙарға, ярлыларға ярҙам күрһәтеү өсөн йыйылған милек*)

**ВАКХАНА́ЛИЯ** *ж* **1.** *ист.* вакханалия (*Боронғо Римда шарап һәм күңел асыу аллаһы Вакх хөрмәтенә эске, кәйеф-сафа ҡороу менән үткәрелгән байрам*) **2.** *перен.* (*оргия*) эскелек, эсеп типтереү

**ВАКХА́НКА** *ж* **1.** вакханка (*Вакх аллаһына бирелгән, вакханалия байрамында ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙ*) **2.** *уст.* фәхишә ҡатын

**ВАКЦИ́НА** *ж*; *мед.* вакцина, һаҡлаусы им (*йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы тороу, шулай уҡ дауалау өсөн ҡулланылған препараттар*); **противотифо́зная вакци́на** тифҡа ҡаршы вакцина

**ВАКЦИНА́ЦИЯ** *ж*; *мед.* вакцинация (*йоғошло ауырыуҙарҙан һаҡланыу өсөн алдан яһала торған прививка*)

**ВАКЦИНИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *кого-что*; *мед.* вакцинация яһау, вакцинациялау

**ВАЛ I** *м* **1.** (*насыпь*) вал, ур; **крепостно́й вал** ҡәлғә уры **2.** (*волна*) ҙур тулҡын ♦ **огнево́й вал** *воен.* ут өйөрмәһе (*артиллерияның атаҡаға барыусы ғәскәр алдынан көсә барған утҡа тотоу һыҙығы*)

**ВАЛ II** *м*; *тех.* вал, үҙәк, күсәр (*һәр төрлө механизмдарҙағы әйләнеп тороусы үҙәк, ҡулса, цилиндр*); **коле́нчатый вал** бөгөмлө вал; **вал сцепле́ния** тоташтырыу үҙәге

**ВАЛ III: по ва́лу** *эк.* вал, вал буйынса (*күләме буйынса халыҡ хужалығында етештерелгән продукция*)

**ВАЛА́НДАТЬСЯ** *несов.*; *прост.* **1.** һуҙмайлау, һуҙмаҡайлау **2.** ваҡыт уҙғарыу, эшнәләшеп йөрөү (*берәйһе менән*)

**ВАЛЕ́ЖНИК** *м собир.* лапы, киҫкә, ятыҡ; **гора́ вале́жника** лапы өйөмө

**ВАЛЁК** *м* **1.** валёк (*түңәрәк ағас йәки металл бурса*); **ката́ть на валька́х** валёктар өҫтөнән тәгәрләтеү **2.** ишкәк һабы **3.** (*в упряжи*) вәлүк, тейәк **4.** (*бельевой*) сәпәмә, бәләк, кер туҡмағы, кер тәгәрәткес

**ВА́ЛЕНКИ** *мн.* (*ед.* **ва́ленок** *м*) быйма; **наде́ть ва́ленки** быйма кейеү

**ВАЛЕ́НТНОСТЬ** *ж*; *хим.* валентлыҡ (*атомдың башҡа атомдарҙағы билдәле бер һаны менән берләшеү үҙенсәлеге*); **постоя́нная вале́нтность** даими валентлыҡ; **переме́нная вале́нтность** алмаш валентлыҡ

**ВАЛЕРЬЯ́НА** и **ВАЛЕРИА́НА** *ж* валерьян, бесәй үләне (*дарыу үләне*)

**ВАЛЕРЬЯ́НКА** *ж*; *разг.* валерьянка, валерьян дарыуы

**ВАЛЕРЬЯ́НОВЫЙ** и **ВАЛЕРИА́НОВЫЙ,** -ая, -ое валерьян ...ы, бесәй үләне ...ы; **валерья́новые ка́пли** валерьян тамсыһы; **валерья́новый ко́рень** бесәй үләне тамыры

**ВАЛЕ́Т** *м*; *карт.* валет; **бубно́вый вале́т** шаҡмаҡ валет

**ВА́ЛИК** *м* **1.** *уменьш. от* **вал** II; **2.** валик (*тахта йәки дивандың ике яҡ башындағы йомро мендәр*)

**ВАЛИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *кого-что* йығыу, ҡолатыу, ауҙарыу, тәгәрәтеү, тәкмәстереү; **ве́тер вали́л телегра́фные столбы́** ел телеграф бағаналарын ауҙарҙы; **вали́ть с ног** *кого-л.* *кемделер* аяҡтан йығыу **2.** *что* ҡырҡыу, йығыу, ҡолатыу, ауҙарыу; **вали́ть дере́вья** ағас ҡырҡыу (йығыу) **3.** *кого-что*; *перен.*, *прост.* үлтереү, юҡ итеү, һәләк итеү, ҡырыу, ҡырып бөтөрөү; **сиби́рская я́зва ста́ла вали́ть скот** себер язваһы малдарҙы ҡыра башланы **4.** *что*; *разг.* тырым-тырағай ташлау, быраҡтырыу; **вали́ть кни́ги в я́щик** китаптарҙы йәшниккә быраҡтырыу **5.** *что*, *на кого-что*; *перен.* һылтау, ауҙарыу, япһарыу; **вали́ть вину́** *на кого-л.* *кемгәлер* ғәйепте япһарыу ♦ **вали́ть всё в одну́ ку́чу** бөтәһен бер ергә өйөү; **вали́ть с больно́й головы́ на здоро́вую** аҡ эттең бәләһе ҡара эткә; **вали́ть че́рез пень коло́ду** илке-һалҡы ғына эшләү

**ВАЛИ́ТЬ II** *несов.*; *разг.* **1.** ағылыу, ағылып килеү, ағылып барыу; **наро́д вали́л на пло́щадь** халыҡ майҙанға ағылды **2.** (*о дыме, паре, снеге и т.д.*) бөрҡорап сығыу, ҡойоп (баҫып) яуыу; **из трубы́ вали́л дым** торбанан бөрҡорап төтөн сыҡты; **снег вали́л хло́пьями** ҡар (ябалаҡлап) баҫып яуҙы **3.** *повел.* **вали́(те)** *прост.* (*побуждение к действию*) әйҙә, йүгер, әйт, һөйлә, эшлә; **вали́ до до́му** йүгер өйгә тиклем; **что молчи́шь, вали́ скоре́й** нишләп өңдәшмәйһең, әйт (һөйлә) тиҙерәк ♦ **вало́м вали́ть** *см.* **вало́м**

**ВАЛИ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** ҡойолоу, төшөп ҡалыу, яуыу; **из теле́ги вали́лось се́но** арбанан бесән ҡойолоп ҡалды; **ша́пка ва́лится с его́ головы́** башынан бүреге төшә; **снег хло́пьями вали́лся** ҡар ябалаҡлап яуҙы **2.** ауыу, ишелеү, емерелеү; **с тре́ском вали́лись дере́вья** шартлап ағастар ауҙы; **ста́рый за́мок ва́лится** иҫке замок емерелә **3.** (*крениться*) ҡыйшайыу, ҡырынайыу; **кора́бль ва́лится на борт** карап бортҡа ҡырыная ♦ **вали́ться с ног** аяҡтан яҙыу, арып йығылыу; **ва́лится из рук**: 1) ҡулдан килмәү; 2) ҡулға эш бармау

**ВАЛИ́ТЬСЯ II** *несов.* *см.* **вали́ть** II

**ВА́ЛКА I** *ж* *см.* **вали́ть** I 1, 2; **ва́лка ле́са** урман ҡырҡыу

**ВА́ЛКА II** *ж см.* **валя́ть** 4; **ва́лка сукна́** буҫтау баҫыу

**ВАЛКИ́** *мн.* (*ед.* **вало́к** *м*); *тех.* валдар; **валки́ прока́тного ста́на** прокат станының валдары

**ВА́ЛКИЙ,** -ая, -ое (*неустойчивый*) тотороҡһоҙ, ауыусан, аунаҡ; **ва́лкая ло́дка** тотороҡһоҙ кәмә ♦ **ни ша́тко, ни ва́лко** яҡшы ла түгел, насар ҙа түгел

**ВА́ЛКОСТЬ** *ж см.* **ва́лкий**; аунаҡлыҡ, тотороҡһоҙлоҡ; **ва́лкость су́дна** судноның аунаҡлығы

**ВАЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** тулай, тулайым, барлыҡ, бөтөнөһө, бөтә; **валова́я проду́кция** тулайым продукция; **валово́й дохо́д** барлыҡ керем **2.** *охот.* бергәләп, күмәкләшеп; **начался́ валово́й пролёт птиц** ҡоштарҙың күмәкләшеп осар ваҡыты башланды

**ВАЛО́К I** *м* (*куча, гряда скошенной травы*) өйөм, теҙем, яҫма; **суши́ть рожь в валка́х** арышты яҫмала киптереү

**ВАЛО́К II** *м см.* **валки́**

**ВАЛО́М: вало́м вали́ть**: 1) ағылып (ябырылып, эркелеп) килеү (барыу); **наро́д вало́м вали́л** халыҡ ябырылып барҙы; 2) нисек етте шулай (*һибеҫ, ҡойоу, түгеҫ*)

**ВАЛТО́РНА** *ж*; *муз.* валторна (*һыбыҙғыға йәки һорнайға оҡшаш еҙ музыка ҡоралы*)

**ВАЛТОРНИ́СТ** *м* волторнасы, волторнала уйнаусы

**ВАЛУ́Й** *м* валуй (*бәшмәк төрө*)

**ВАЛУ́Н** *м* һарыҡташ

**ВАЛУ́Х** и **ВА́ЛУХ** *м*; *прост.* бестерелгән һарыҡ тәкәһе

**ВА́ЛЬДШНЕП** *м* ҡурпысыҡ (*ҡош*); **крик ва́льдшнепа** ҡурпысыҡ тауышы

**ВАЛЬС** *м* вальс (*талғын ғына парлы бейеү һәм шул бейеүҙең музыкаһы*); **кружи́ться в ва́льсе** вальста әйләнеү

**ВАЛЬСИ́РОВАТЬ** и *уст.* **ВАЛЬСИРОВА́ТЬ** *несов.* вальс бейеү

**ВАЛЬЦЕВА́ТЬ** *несов. что*; *тех.* вальцовкалау, вальцевать итеү (*валецтар менән йәнсеү, онтау, яҫмаҡлау*); **вальцева́ть желе́зный лист** ҡалай вальцовкалау

**ВАЛЬЦЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **вальцева́ть** вальцовкаланыу, вальцевать ителеү

**ВАЛЬЦО́ВКА** *ж*; *тех.* **1.** *см.* **вальцева́ть**; **вальцо́вка ко́жи** тирене вальцевать итеү **2.** (*машина*) вальцовка **3.** *перен.*, *разг.* вальцовка (*юғары сортлы он*)

**ВАЛЬЦО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* вальцовкалау ...ы, вальцовка ...ы; **вальцо́вочный цех** вальцовкалау цехы

**ВАЛЬЦО́ВЩИК** *м* вальцовкалаусы

**ВАЛЬЦЫ́** *мн.*; *тех.* валецтар; **дроби́льные вальцы́** сүкеү валецтары

**ВАЛЬЯ́ЖНОСТЬ** *ж*; *уст.* мөһабәтлек, күренеклелек

**ВАЛЬЯ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* мөһабәт, күренекле; **валья́жный вид** мөһабәт ҡиәфәт

**ВАЛЮ́ТА** *ж* **1.** (*денежная единица*) валюта; **твёрдая валю́та** тотороҡло валюта; **па́дающая валю́та** кәмеүсе валюта **2.** валюта, сит ил аҡсаһы; **купи́ть на валю́ту** сит ил аҡсаһына һатып алыу

**ВАЛЮ́ТНЫЙ,** -ая, -ое валюта ...ы; **валю́тный кри́зис** валюта кризисы ♦ **валю́тный курс** валюта курсы (*төрлө валюталар араһындағы мөнәсәбәт*; *хисаплашыуҙа берәй илдең сит ил аҡса берәмеген ҡулланыуы*)

**ВАЛЮ́ТЧИК** *м*; *разг.* валютасы

**ВАЛЯ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** быйма (кейеҙ) баҫыу ...ы; **валя́льное произво́дство** быйма баҫыу производствоһы **2.** (*служащий для валяния*) быйма (кейеҙ) баҫыу ...ы; **валя́льная маши́на** быйма баҫыу машинаһы

**ВАЛЯ́ЛЬЩИК** *м* быйма (кейеҙ) баҫыусы

**ВА́ЛЯНЫЙ,** -ая, -ое (йөндән) баҫылған, кейеҙ ...ы; **ва́ляная о́бувь** баҫылған аяҡ кейеме; **ва́ляные сапоги́** кейеҙ итектәр

**ВАЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* әүәләү, аунатыу; **валя́ть по сне́гу** ҡарҙа аунатыу; **валя́ть котле́ты в муке́** котлеттарҙы онда әүәләү **2.** *безл.* (*о сильной качке*) бәүелдереү, сайҡалдырыу, тирбәлдереү; **парохо́д валя́ло с бо́ку на́ бок** пароходты ян-яҡҡа сайҡалдырҙы **3.** *что* (*скатывать*) тәгәрәтеү, тумалаҡлау; **валя́ть сне́жный ком** ҡар тәгәрәтеү **4.** *что* (*сбивать из шерсти, пуха и т.д.*) баҫыу; **валя́ть во́йлок** кейеҙ баҫыу **5.** *повел.* **валя́й(те)** *прост.* әйҙә (йүгер, әйт, һөйлә, эшлә) ♦ **валя́ть дурака́**: 1) (*бездельничать*) бушты-бушҡа ауҙарыу, бер ни ҙә эшләмәү, йөн тибеү; 2) (*дурачиться*) ахмаҡ булып ҡыланыу, ахмаҡҡа һалышыу

**ВАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** аунау, аунаҡлау; **валя́ться на траве́** үләндә аунау **2.** *разг.* тик ятыу, бер ни эшләмәү; **он це́лыми дня́ми валя́ется на дива́не** ул көндәр буйы диванда тик ята **3.** *разг.* (*лежать в беспорядке — о вещах*) аунап ятыу, туҙып ятыу; **бума́га валя́ется на полу́** ҡағыҙ иҙәндә туҙып ята **4.** *страд. от* **валя́ть** 1, 3, 4 ♦ **валя́ться в нога́х** аяҡҡа йығылып үтенеү, ялбарыу; **на доро́ге (на у́лице, на полу́) не валя́ется** *что* юлда аунап ятмай (*бер нәмә лә бушҡа ғына бирелмәй*)

**ВАМПИ́Р** *м* **1.** *миф.* убыр (*әкиәттәрҙә ҡәберҙән сығып кеше ҡанын һурыусы зат*) **2.** *зоол.* вампир, ҙур ярғанат

**ВАНА́ДИЕВЫЙ,** -ая, -ое ванадийлы; **вана́диевая сталь** ванадийлы ҡорос

**ВАНА́ДИЙ** *м* ванадий (*химик элемент, аҡһыл-көлһыу төҫтәге ҡаты металл*)

**ВАНДА́Л** *м* **1.** *мн.* **ванда́лы** вандал (*Рим империяһының бер өлөшөн баҫып алып, тар-мар итеүсе боронғо герман ҡәбиләһе*) **2.** вандал, вәхиш (*мәҙәниәт ҡиммәттәрен емереүсе*) **3.** тупаҫ, әҙәпһеҙ, наҙан кеше

**ВАНДАЛИ́ЗМ** *м* вандализм (*мәҙәниәт һәм сәнғәт ҡомартҡыларын аяуһыҙ емерең һәм юҡ итең*)

**ВАНИЛИ́Н** *м* ванилин (*кондитер изделиеларында ҡулланылған хуш еҫле тәмләткес*)

**ВАНИЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое ванилинлы

**ВАНИ́ЛЬ** *ж* ваниль (*тропик үҫемлек һәм уның аш-һыу, хушбуйҙар әҙерләүҙә ҡулланылған еҫле емеше*)

**ВАНИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ваниль …ы; **вани́льный порошо́к** ваниль онтаҡ **2.** ванилле; **вани́льные сухари́** ванилле сохарый

**ВА́ННА** *ж* **1.** (*сосуд для купания*) ванна, ҡорна; **де́тская ва́нна** балалар ҡорнаһы **2.** (*процесс мытья*) ванна; **приня́ть ва́нну** ванна ҡабул итеү, ванна инеү **3.** (*лечение, укрепление организма воздействием на него солнца, воздуха*) ванна; **со́лнечные ва́нны** ҡояш ваннаһы (*ҡыҙыныу*)

**ВА́ННАЯ** *ж* ванна (ҡорна) бүлмәһе

**ВА́ННЫЙ,** -ая, -ое ванна …ы, ванналы; **ва́нная ко́мната** ванна бүлмәһе

**ВА́НТЫ** *мн.* (*ед.* **ва́нта** *ж*); *мор.* ванталар (*мачтаны борт менән беркетеп торған йыуан тимер арҡан*)

**ВАР** *м* ыуар (*ҡайнатылған ыҫмала*) ♦ **как (сло́вно, то́чно) ва́ром обда́ть** *прост.* тән эҫеләһыуыҡлы булып китеү

**ВАРА́КУШКА** *ж* көйәҙ һандуғас (*асыҡ төҫтәге йырсы ҡош, башҡа ҡоштарға оҡшатып йырлауы менән айырылып тора*)

**ВАРА́Н** *м* варан (*көньяҡ кеҫәрткеләренең бер төрө*)

**ВА́РВАР** *м* **1.** *ист.* варвар (*боронғо гректарҙа һәм римляндарҙа сит ил кешеһе*) **2.** *перен.* наҙан кеше **3.** *перен.* тупаҫ, вәхши, ҡанһыҙ, шәфҡәтһеҙ (*кеше*)

**ВАРВАРИ́ЗМ** *м*; *лингв.* варваризм (*әҙәби тел нормаларын боҙа торған сит тел һүҙе йәки һүҙбәйләнештәр*)

**ВА́РВАРСКИ** *нареч.* **1.** тупаҫ, ҡырағайҙарса; **ва́рварски относи́ться** тупаҫ мөнәсәбәт күрһәтеү **2.** ҡанһыҙ, шәфҡәтһеҙ, вәхшиҙәрсә

**ВА́РВАРСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *ист.* варвар(ҙар) …ы, варвар …ы; **ва́рварские племена́** варвар ҡәбиләләре **2.** варварҙарса, вәхшиҙәрсә; **ва́рварское отноше́ние к культу́рным це́нностям** мәҙәни байлыҡтарға вәхшиҙәрсә мөнәсәбәт **3.** тупаҫ, ҡырағай, кешелекһеҙ, рәхимһеҙ, ҡанһыҙ; **ва́рварский спо́соб** тупаҫ ысул

**ВА́РВАРСТВО** *с* **1.** вәхшилек, варварлыҡ; **дойти́ до преде́ла ва́рварства** вәхшилектең сигенә етеү **2.** (*жестокость, грубость*) ҡанһыҙлыҡ, кешелекһеҙлек; **прояви́ть ва́рварство** ҡанһыҙлыҡ күрһәтеү

**ВА́РЕВО** *с*; *прост.* өйрә, шыйыҡ аш; **кипе́ли котлы́ с ва́ревом** ҡаҙандарҙа өйрә ҡайнаны

**ВА́РЕЖКИ** *мн.* (*ед.* **ва́режка** *ж*) бейәләй; **то́лстые ва́режки** ҡалын бейәләй; **наде́ть ва́режки** бейәләй кейеү

**ВАРЕНЕ́Ц** *м* ҡатыҡ

**ВАРЕ́НИЕ** *с см.* **вари́ть**

**…ВАРЕ́НИЕ** *с* (*урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең икенсе өлөшө беренсе һүҙ белдергән нәмәне әҙерләүҙе* (“*ҡойоу*”, “*ҡайнатыу*”, “*бешереү*”) *аңлата*); **сталеваре́ние** ҡорос ҡойоу; **пивоваре́ние** һыра ҡайнатыу

**ВАРЕ́НИКИ** *мн.* (*ед.* **варе́ник** *м*) эремсек билмәне, сүсбәрә, кәкре, ҡаҙан ҡолағы (бөккәне)

**ВАРЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бешкән; **варёное мя́со** бешкән ит **2.** *спец.* бешерелгән, ҡайнатылған; **варёный клей** ҡайнатылған елем **3.** *перен.* (*вялый*) хәлһеҙ, бәлтерәгән

**ВАРЕ́НЬЕ** *с* ҡайнатма, варенье; **вишнёвое варе́нье** сейә ҡайнатмаһы

**ВАРИА́НТ** *м* **1.** вариант, төр; **вариа́нты прое́кта** проекттың варианттары **2.** *лит., муз.* вариант (*әҙәби һәм музыка әҫәрҙәренең төп тексынан айырмалы башҡа бер төрө*); **вариа́нты рома́на** романдың варианттары

**ВАРИАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое вариацион, вариациялы; **вариацио́нная фо́рма в му́зыке** музыкала вариацион форма ♦ **вариацио́нное исчисле́ние** *мат.* вариациялы юл менән иҫәпләп сығарыу

**ВАРИА́ЦИЯ** *ж* вариация, төр (**1.** *бер нәмәнең нигеҙен һаҡлап, өлөштәрен үҙгәртең* **2.** *муз. айырым элементтарын яңыртып эшкәртеүҙән торған музыкаль теманың айырым төрҙәре*)

**ВАРИ́ТЬ** *несов. что* **1.** бешереү, ҡайнатыу; **вари́ть мя́со** ит бешереү; **вари́ть обе́д** төшкө аш бешереү **2.** *тех.* иретеү, йәбештереү, иретеп йәбештереү; **вари́ть сталь** ҡорос иретеү; **вари́ть тру́бы** торбаларҙы иретеп йәбештереү ♦ **голова́ ва́рит** *у кого*; *прост.* башы эшләй, тиҙ төшөнә; **желу́док ва́рит** ашҡаҙан ашты эшкәртә

**ВАРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бешеү; **ры́ба ва́рится в котле́** балыҡ ҡаҙанда бешә **2.** *страд. от* **вари́ть** ♦ **вари́ться в со́бственном соку́** үҙ ҡаҙанында ҡайнау

**ВА́РКА** *ж см.* **вари́ть**; **ва́рка ста́ли** ҡорос иретеү

**ВА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое бешереү …ы, ҡайнатыу …ы; **ва́рочные котлы́** бешереү ҡаҙандары

**ВАРЬЕТЕ́** *с нескл.* варьете (*еңел жанрҙағы эстрада театры*)

**ВАРЬИ́РОВАТЬ** *несов. что* үҙгәртеү, төрләләндереү, яңы вариантын эшләү; **варьи́ровать расска́з** хикәйәне үҙгәртеү

**ВАРЬИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*разнообразиться*) үҙгәреү, төрләләнеү **2.** *страд. от* **варьи́ровать**

**ВАРЯ́ГИ** *мн.* (*ед.* **варя́г** *м*) варягтар (*IX—X бб. талау һәм һатыу итең маҡсаты менән Көнсығыш Европаға походтар яһаған нормандарҙың боронғо атамаһы*)

**ВАРЯ́ЖСКИЙ,** -ая, -ое варяг …ы; **варя́жские племена́** варяг ҡәбиләләре

**ВАСИЛЁК** *м* күк сәскә

**ВАСИЛИ́СК** *м* **1.** *зоол.* василиск (*тропик Америкала таралған оҙон ҡойроҡло кеҫәртке*) **2.** *миф.* юха йылан, аждаһа

**ВАСИЛЬКО́ВЫЙ,** -ая, -ое зәңгәр-күк (*төҫ*); **василько́вые глаза́** зәңгәр-күк күҙҙәр

**ВАССА́Л** *м* вассал (**1.** *тар. урта быуатта Көнбайыш Европала эре феодалға бойондороҡло ваҡ феодал* **2.** *күсм. бойондороҡло дәүләт йәки кеше*)

**ВАССА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** вассал ...ы, вассаллыҡ ...ы; **васса́льные отноше́ния** вассаллыҡ мөнәсәбәттәре **2.** *перен.* бойондороҡло, вассал ...ы; **васса́льные стра́ны** бойондороҡло илдәр

**ВА́ТА** *ж* мамыҡ; **медици́нская ва́та** медицина мамығы; **пальто́ на ва́те** эслеге мамыҡ пальто

**ВАТА́ГА** *ж* **1.** *разг.* өйөр, көтөү, төркөм; **вата́га ребя́т** бер төркөм балалар **2.** *спец.* (*промысловая, преим. рыболовецкая, артель*) ватага, балыҡсылар артеле; **рыболове́цкая вата́га** балыҡсылар артеле

**ВАТЕРЛИ́НИЯ** *ж*; *мор.* ватерлиния (*судно бортының һыу менән ҡумелә торған һыҙығы*)

**ВАТЕРМАШИ́НА** *ж*; *тех.* ватермашина (*йөн, етен, мамыҡ иләү машинаһы*)

**ВА́ТЕРНЫЙ,** -ая, -ое ватер ...ы; **ва́терный цех** ватер цехы

**ВАТЕРПА́С** *м*; *тех.* ватерпас, тигеҙләүес (*горизонталь тигеҙлекте билдәләй торған прибор*)

**ВАТЕРПОЛИ́СТ** *м* и **ВАТЕРПОЛИ́СТКА** *ж* ватерполсы

**ВАТЕРПО́ЛО** *с нескл.*; *спорт.* ватерполо (*һыуҙа уйналған туп уйыны*)

**ВАТИ́Н** *м* ватин; **пальто́ на вати́не** ватин эсле пальто

**ВА́ТМАН** *м* ватман (*һүрәт төшөрөүгә, һыҙмаға яраҡлы иң юғары сортлы ҡағыҙ*)

**ВА́ТМАНСКИЙ: ва́тманская бума́га** ватман ҡағыҙ

**ВА́ТНИК** *м*; *разг.* һырма, һырылған мамыҡ куртка

**ВА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мамыҡ ...ы; **ва́тное произво́дство** мамыҡ етештереү **2.** (*сделанный на вате*) мамыҡ, мамыҡтан яһалған; **ва́тное одея́ло** мамыҡ юрған

**ВАТРУ́ШКА** *ж* эремсек бәрәмәсе, шәңгә

**ВАТТ** *м*; *физ.* ватт (*электр тоғының ҡеүәтен үлсәү берәмеге*); **ла́мпочка в сто ватт** йөҙ ватлы лампочка

**ВАТТМЕ́ТР** *м*; *физ.* ваттметр (*электр тоғын ваттарҙа үлсәү приборы*)

**ВАТТ-СЕКУ́НДА** *ж*; *физ.* ватт-секунд

**ВАТТ-ЧА́С** *м*; *физ.* ватт-сәғәт

**ВА́ФЕЛЬНИЦА** *ж* вафельница (*вафля бешерә торған һауыт*)

**ВА́ФЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** вафля ...ы, вафля етештереү ...ы; **ва́фельное те́сто** вафля ҡамыры; **ва́фельный цех** вафля етештереү цехы **2.** (*о ткани*) шаҡмаҡ бүртмәсле, күҙлекәй (*бүртмәсләнеп, вафляға оҡшап торған шаҡмаҡлы*); **ва́фельное полоте́нце** күҙлекәй таҫтамал

**ВА́ФЛЯ** *ж* вафля (*өҫтө шаҡмаҡ бүртмәсле йоҡа ҡоро печенье*); **ва́фли с кре́мом** кремлы вафлялар

**ВА́ХМИСТР** *м* вахмистр (*иҫке урыҫ армияһында атлы ғәскәрҙә һалдатҡа бирелгән дәрәжә*)

**ВА́ХТА** *ж* **1.** вахта, һаҡ хеҙмәте; **стоя́ть на ва́хте** вахтала тороу **2.** *перен.* вахта; **ва́хта ми́ра** тыныслыҡ вахтаһы; **трудова́я ва́хта** хеҙмәт вахтаһы

**ВА́ХТЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** вахта ...ы, карапта һаҡта тороу ...ы; **ва́хтенная слу́жба** карапта һаҡта тороу хеҙмәте **2.** вахтала тороусы, һаҡта тороусы; **ва́хтенный матро́с** вахтала тороусы матрос ♦ **ва́хтенный журна́л** вахта журналы

**ВАХТЁР** и *уст.* **ВА́ХТЕР** *м* вахтёр, дежур ҡарауылсы (*берәй учреждениела*)

**ВАХТЁРСКИЙ** и *уст.* **ВА́ХТЕРСКИЙ,** -ая, -ое вахтёр ...ы, вахтёрлыҡ ...ы; **вахтёрское ме́сто** вахтёр урыны

**ВАШ** *м* (ваша *ж*, ваше *с*) *мест.* **1.** һеҙҙең, һеҙҙең ...ығыҙ; **ваш дом** һеҙҙең өй; **ва́ша кни́га** һеҙҙең китабығыҙ; **ва́ше письмо́** һеҙҙең хат; **ва́ши слова́** һеҙҙең һүҙҙәрегеҙ **2.** *в знач. сущ.* **ва́ше** *с*; *разг.* һеҙҙеке; **ва́шего мне не ну́жно** һеҙҙеке миңә кәрәкмәй **3.** *в знач. сущ.* **ва́ши** *мн.*; *разг.* (*родные, близкие*) һеҙҙекеләр, һеҙҙең туғандарығыҙ; **ва́ши бы́ли у нас** һеҙҙекеләр беҙҙә булды ♦ **ваш** (*в конце письма*) һеҙҙең; **ваш брат** һеҙҙең ише кешеләр; **ва́ше благоро́дие**; **ва́ше превосходи́тельство**; **ва́ше сия́тельство** ғали йәнәптәре; **ва́ше де́ло** һеҙгә генә ҡағылған һорау, һеҙ хәл итә торған эш; **не ва́ше де́ло** һеҙҙең эш түгел; **ва́ша берёт (взяла́)** һеҙ еңдегеҙ, һеҙҙеке өҫкә сыҡты; **во́ля ва́ша** үҙ ихтыярығыҙҙа; үҙегеҙ беләһегеҙ; **и на́шим и ва́шим** ике яҡлы бысаҡ; һеҙгә лә, беҙгә лә (*ике йөҙлө кеше тураһында*); **по-ва́шему** һеҙҙеңсә

**ВА́ША** *ж мест. см.* **ваш**

**ВА́ШГЕРД** *м*; *тех.* вашгерд (*алтынлы ҡомдо йыуҙыра торған ябай ғына ҡулайлама*)

**ВА́ШЕ** *с мест. см.* **ваш**

**ВА́ШИ** *мн. мест. см.* **ваш**

**ВАЯ́НИЕ** *с* **1.** һәйкәл ҡойоу (һалыу) **2.** (*искусство*) һәйкәл ҡойоу (һалыу) сәнғәте; **шко́ла жи́вописи и ва́яния** һынлы сәнғәт һәм һәйкәл ҡойоу мәктәбе

**ВАЯ́ТЕЛЬ** *м*; *высок.* һәйкәлсе, һынсы, скульптор

**ВАЯ́ТЬ** *несов. что* һәйкәл һалыу (*ағастан, таштан, тимерҙән ҡырып, юнып, соҡоп, эүәләп, ҡойоп һ.б.*)

**ВБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **вбежа́ть**

**ВБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** йүгереп килеп инеү, йүгереп инеү; **вбежа́ть в ко́мнату** бүлмәгә йүгереп килеп инеү **2.** (*взбежать*) йүгереп менеү (менеп

китеү); **вбежа́ть по ле́стнице** баҫҡыстан йүгереп менеү

**ВБИВА́ТЬ** *несов. см.* **вбить**

**ВБИРА́ТЬ** *несов. см.* **вобра́ть**

**ВБИ́ТЬ** *сов. что* ҡағыу, һуғып (ҡағып) индереү; **вбить гвоздь в сте́ну** стенаға ҡаҙау ҡағыу ♦ **вбить в го́лову** тылҡыу, башҡа (мейегә) һеңдереү; **вбить себе́ в го́лову** үҙеңдең фекереңдән ҡайтмау, үҙеңдең һүҙеңде бирмәү

**ВБЛИЗИ́** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* яҡында; **его́ уже́ не́ было вблизи́** ул яҡында юҡ ине инде **2.** *предлог с род. п.* янында, эргәһендә; **вблизи́ реки́** йылға эргәһендә

**ВБОК** *нареч.* бер яҡ ситкә, бер яҡҡа, ҡабырғаға; **смотре́ть вбок** бер яҡ ситкә ҡарау

**ВБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **вбро́сить**

**ВБРА́СЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вбра́сывать**

**ВБРОД** *нареч.* кисеп; **перейти́ ре́ку вброд** йылғаны кисеп сығыу

**ВБРО́СИТЬ** *сов. что* эскә төшөрөү (ташлап ебәреү, ырғытыу); **вбро́сить мяч в окно́** тупты тәҙрәнән эскә ырғытыу

**ВБУ́ХАТЬ** *сов. что*; *прост.* ҡапыл күп итеп һалыу, күп итеп ҡойоу, ауҙарыу; **вбу́хать всю муку́ в я́щик** бөтә ондо йәшниккә ҡапыл ауҙарыу

**ВВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **ввали́ть**

**ВВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ввали́ться** **2.** *страд. от* **вва́ливать**

**ВВАЛИ́ВШИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич.* от **ввали́ться** **2.** *прил.* эскә батҡан, өңрәйгән, соҡорайған; **ввали́вшиеся щёки** эскә батҡан яңаҡтар

**ВВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (эскә) ауҙарыу (өйөү, түгеү, ташлау); **ввали́ть ры́бу в ло́дку** балыҡты кәмәгә ауҙарыу **2.** *прост.* (*войти, вбежать толпой*) күмәкләп килеп тулыу, килеп инеү; **толпа́ ввали́ла во двор** күмәк кешеләр ишек алдына килеп тулды

**ВВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *во что*; *разг.* (*упасть*) йығылып төшөү, ҡолау; **ввали́ться в я́му** соҡорға йығылып төшөү **2.** (*стать впалым*) эскә батыу, өңөлөү, өңрәйеү, соҡорайыу; **у больно́го ввали́лись щёки** ауырыуҙың яңаҡтары эскә батҡан; **глаза́ ввали́лись** күҙҙәре өңрәйгән **3.** *прост.* (*войти*) килеп инеү, килеп тулыу; **толпа́ ввали́лась в коридо́р** бер төркөм халыҡ коридорға килеп тулды

**ВВЕДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ввести́ — вводи́ть**; **введе́ние систе́мы всео́бщего обуче́ния** дөйөм белем биреү системаһын индереү; **введе́ние войск** ғәскәр индереү **2.** (*вступительная часть*) инеш, инеш һүҙ; **введе́ние к главе́** бүлеккә инеш **3.** (*вступительная часть, представляющая собой раздел науки*) инеш; **введе́ние в языкозна́ние** тел ғилеменә инеш

**ВВЕЗТИ́** *сов. кого-что* **1.** (*внутрь*) индереү, керетеү; **снопы́ ввезли́ в сара́й** көлтәләрҙе һарайға индерҙеләр; **ввезти́ това́ры из-за грани́цы** сит илдән тауар индереү **2.** (*наверх*) мендереү, мендереп ҡуйыу, алып менеү, күтәреү; **ввезти́ на го́ру** тауға мендереп ҡуйыу

**ВВЕК** *нареч.* **1.** *разг.* (*при глаголе с отрицанием*) ғүмергә, ғүмерҙә лә, (һис) бер ваҡытта ла, һис (бер) ҡасан да; **ввек э́того не забу́ду** ғүмергә быны онотмам **2.** *уст.* (*всегда*) һәр ваҡытта, мәңге; **боги́ня красоты́ прекра́сна бу́дет ввек** матурлыҡ аллаһы һәр ваҡытта ла гүзәл булыр

**ВВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **вве́ргнуть**

**ВВЕРГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вве́ргнуться** **2.** *страд. от* **вверга́ть**

**ВВЕ́РГНУТЬ** *сов. кого-что* **1.** *уст.* (*с силой поместить куда-л.*) ябыу, ҡамау, бикләү; **вве́ргнуть в темни́цу** ҡараңғы зинданға ябыу **2.** дусар итеү, төшөрөү; **вве́ргнуть в отча́яние** өмөтһеҙлеккә төшөрөү, өмөтһеҙлеккә дусар итеү

**ВВЕ́РГНУТЬСЯ** *сов.* ябылыу, ҡамалыу, бикләнеү

**ВВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич.* и *прил.* ышанып тапшырылған; **вве́ренное вам учрежде́ние** һеҙгә ышанып тапшырылған учреждение

**ВВЕ́РИТЬ** *сов. кого-что, кому-чему* ышанып тапшырыу, ышанып әйтеү (һөйләү, уртаҡлашыу, ҡарамағына тапшырыу, биреү); **вве́рить свою́ судьбу́** *кому-л. кемгәлер* үҙеңдең яҙмышыңды ышанып тапшырыу; **вве́рить та́йну** ышанып, сер уртаҡлашыу

**ВВЕ́РИТЬСЯ** *сов. кому-чему* ышаныу, үҙен ышанып тапшырыу; **вве́риться до́ктору** докторға ышаныу

**ВВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** бороу, бороп индереү; **вверну́ть электри́ческую ла́мпочку в патро́н** электр лампочкаһын патронға бороу **2.** *разг.* ҡыҫтырып ебәреү, ҡатыштырыу, ҡушыу (*һүҙ, иҫкәрмә һ.б.*); **вверну́ть слове́чко** һүҙ ҡыҫтырып ебәреү, һүҙгә ҡушылыу

**ВВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* боролоу, боролоп инеү; **винт хорошо́ вверну́лся** винт яҡшы боролдо

**ВВЕРСТА́ТЬ** *сов. что*; *полигр.* наборға ҡушымта индереү

**ВВЁРСТЫВАТЬ** *несов. см.* **вверста́ть**

**ВВЕРХ** *нареч.* **1.** өҫкә, өҫкә табан, юғарыға; **подня́ться вверх** юғарыға күтәрелеү; **смотре́ть вверх** өҫкә ҡарау **2.** (*к истоку реки*) үргә, үренә табан; **плыть вверх по реке́** йылға үренә табан йөҙөү ♦ **вверх дном (нога́ми)** аҫты-өҫкә, баш түбән; **ру́ки вверх!** ҡулдарыңды күтәр!

**ВВЕРХУ́** *нареч.* өҫтә, юғарыла, үрҙә

**ВВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **вве́рить**

**ВВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вве́риться** **2.** *страд. от* **вверя́ть**

**ВВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* индереү, керетеү, индереп (керетеп) ебәреү; **ввести́ войска́ в го́род** ҡалаға ғәскәр индереү **2.** *кого-что* (*включить в состав*) индереү, теркәү; **ввести́ в соста́в коми́ссии** комиссия составына индереү **3.** *что* (*влить, впустить*) индереү, ебәреү; **ввести́**

**глюко́зу в ве́ну** венаға глюкоза ебәреү **4.** *кого-что* (*вовлечь*) бутау, яңылыштырыу, аҙаштырыу; **ввести́ в заблужде́ние** яңылыштырыу, бутау **5.** *что* (*установить*) индереү; **ввести́ но́вые ме́тоды** яңы ысул(дар) индереү; **ввести́ но́вые поря́дки** яңы тәртип индереү **6.** (*в сочет. с сущ. и предлогом "в"*) индереп ебәреү, килтереү, эшләй башлатыу, сафҡа индереү, файҙаланыуға тапшырыу; **ввести́ в бой** һуғышҡа индереү; **ввести́ в эксплуата́цию** файҙаланыуға тапшырыу; **ввести́ в де́йствие** хәрәкәткә килтереү, эшләй башлатыу; **ввести́ в оборо́т** әйләнешкә индереп ебәреү; **ввести́ в употребле́ние** ҡулланыуға индереп ебәреү ♦ **ввести́ во владе́ние** рәсми рәүештә милеккә әйләндереү; **ввести́ в дом** таныштырыу; **ввести́ в курс де́ла (в суть вопро́са)** эштең айышына (асылына) төшөндөрөү

**ВВЕСТИ́СЬ** *сов. безл.* (*войти в употребление*) индерелеү, инеп китеү; **ввело́сь в обы́чай** йолаға инеп китте

**ВВИДУ́** *предлог с род. п.* (*по причине чего-л.*) сәбәпле, арҡаһында, айҡанлы, -ға/-гә күрә, -ғанлыҡтан/-гәнлектән; **ввиду́ боле́зни** ауырыу булыу сәбәпле; **ввиду́ недоста́тка вре́мени** ваҡыт етмәгәнлектән

**ВВИНТИ́ТЬ** *сов. что* бороп индереү; **ввинти́ть шуру́п** шөрөп бороп индереү

**ВВИНТИ́ТЬСЯ** *сов. что* бороп индерелеү, боролоу

**ВВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **ввинти́ть**

**ВВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ввинти́ться** **2.** *страд. от* **вви́нчивать**

**ВВИТЬ** *сов. что* ҡушып үреү (ишеү); **ввить ле́нту в вено́к** венокка таҫма ҡушып үреү

**ВВОД** *м* **1.** *см.* **ввести́** – **вводи́ть**; **ввод войск** ғәскәр индереү; **ввод в де́йствие но́вых предприя́тий** яңы предприятиеларҙы сафҡа индереү **2.** *тех.* (*место*) индереү урыны

**ВВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **ввести́**

**ВВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ввести́сь** **2.** *страд. от* **вводи́ть**

**ВВО́ДНЫЙ** и **ВВОДНО́Й,** -ая, -ое **1.** индереү ...ы, керетеү ...ы; **вво́дное отве́рстие** керетеү тишеге **2.** (*вступительный*) инеш; **вво́дная ле́кция** инеш лекция **3.** (*вставной*) өҫтәмә; **вво́дный о́браз** өҫтәмә образ ♦ **вво́дное сло́во** *грам.* инеш һүҙ; **вво́дное предложе́ние** *грам.* инеш һөйләм

**ВВОЗ** *м* **1.** *см.* **ввезти́**; **ввоз това́ров** тауар индереү **2.** импорт, индерелгән тауар; **ввоз хле́ба** икмәк импорты

**ВВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **ввезти́**

**ВВОЗИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **ввози́ть**

**ВВО́ЗНЫЙ** и **ВВОЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** ситтән индерелгән; **вво́зный това́р** ситтән индерелгән тауар **2.** (*взимаемый за ввоз*) ситтән индереү ...ы; **вво́зная по́шлина** ситтән индереү пошлинаһы

**ВВОЛА́КИВАТЬ** *несов. см.* **вволо́чь**

**ВВОЛА́КИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вволáкивать**

**ВВОЛО́ЧЬ** *сов. кого-что*; *прост.* һөйрәү, һөйрәп индереү, тартыу, тартып индереү; **вволо́чь брёвна в сара́й** бүрәнәләрҙе һарайға һөйрәп индереү

**ВВО́ЛЮ** *нареч.*; *разг.* туйғанса, теләгәнсә, теләгән тиклем (саҡлы); **вво́лю нае́сться** туйғансы ашау; **вво́лю игра́ть** теләгәнсә уйнау; **отдохну́ть вво́лю** теләгәнсә ял итеү

**ВВО́СЬМЕРО** *нареч.* һигеҙ тапҡыр (мәртәбә); **вво́сьмеро бо́льше** һигеҙ тапҡыр артығыраҡ (күп)

**ВВОСЬМЕРО́М** *нареч.* һигеҙ кеше бергә; **мы ввосьмеро́м** беҙ һигеҙебеҙ бергә

**В-ВОСЬМЫ́Х** *вводн. сл.* һигеҙенсенән

**ВВЫСЬ** *нареч.* юғарыға, үргә, өҫкә; **самолёт бы́стро подня́лся ввысь** самолёт бик тиҙ юғарыға күтәрелде

**ВВЯЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*вплести вязанием*) ҡушып бәйләү (ҡуша бәйләү), бәйләп ҡушыу; **ввяза́ть пя́тку в чуло́к** үксәне ойоҡҡа бәйләп ҡушыу **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*вовлечь, впутать*) бутау, ҡатнаштырыу, ылыҡтырыу, ҡыҫтырыу; **ввяза́ть в неприя́тную исто́рию** *кого-л. кемделер* насар эшкә ылыҡтырыу

**ВВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡыҫылыу, ҡатнашыу, ҡатнашып китеү, ҡыҫылып китеү, тығылыу; **ввяза́ться в чужо́й разгово́р** сит кеше һүҙенә ҡыҫылыу; **полк ввяза́лся в бой** полк һуғышҡа ҡатнашып китте

**ВВЯ́ЗКА** *ж*; *разг. см.* **ввяза́ть**

**ВВЯ́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **ввя́зывать**

**ВВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **ввяза́ть**

**ВВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ввяза́ться** **2.** *страд. от* **ввя́зывать**

**ВГИБ** *м* бөгөү, бөгөм, бөгөлөш, бөгөлмә

**ВГИБА́ТЬ** *несов. см.* **вогну́ть**

**ВГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вогну́ться** **2.** *страд. от* **вгиба́ть**

**ВГЛУБЬ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* эскә, эскә табан, тәрәнгә; **продвига́ться вглубь** эскә табан үтеү **2.** *предлог с род. п.* эсенә, төпкөлөнә; **вглубь страны́** илдең төпкөлөнә

**ВГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *сов. в кого-что* текләп (текәлеп, ентекләп) ҡарау; **вгляде́ться в темноту́** ҡараңғыға текләп ҡарау

**ВГЛЯ́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **вгляде́ться**

**ВГНЕЗДИ́ТЬСЯ** *сов.* (*вселиться, укорениться*) урынлашыу, төпләнеү, тамыр йәйеү

**ВГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вогна́ть**

**ВГОНЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **вгоня́ть**

**ВГОРЯЧА́Х** *нареч.*; *разг.* ҡыҙыулыҡ менән, ҡыҙып китеп, ҡыҙып, ярһып; **вгорячах вы́сказаться** ҡыҙыулыҡ менән әйтеп ташлау

**ВГРЫЗА́ТЬСЯ** *несов. в кого-что*; *разг.* (*вцепляться зубами*) тештәрҙе батырыу, тештәр менән әләктереү

**ВДАВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **вда́ться**

**ВДАВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *во что* батырыу, батырып индереү; **вдави́ть про́бку в буты́лку** бөкөнө шешәгә батырыу **2.** (*вмять*) йәнсеү, йәнсекләү, йәнсеп бөтөрөү, йәмшәйтеү

**ВДАВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*вогнуться, вмяться*) иҙелеү, йәнселеү; **зерно́ под колесо́м вдави́лось** ашлыҡ тәгәрмәс аҫтында иҙелде **2.** (*углубиться*) соҡорайтып (соҡорлатып) инеп китеү, соҡорлау

**ВДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **вдави́ть**

**ВДА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вда́вливать**

**ВДАЛЕКЕ́** и **ВДАЛИ́** *нареч.* алыҫта, йыраҡта; **вдалеке́ от го́рода** ҡаланан алыҫта

**ВДАЛЬ** *нареч.* алыҫҡа, йыраҡҡа; **гляде́ть вдаль** алыҫҡа ҡарау

**ВДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*вклиниться*) инеп китеү (тороу), эскә (төпкә) инеү; **скала́ вдала́сь в мо́ре** ҡая диңгеҙгә инеп тора **2.** батыу, батып инеү, тишеп инеү, йәнсеп инеү, соҡорайтып инеп китеү **3.** *перен.* (*предаться чему-л.*) бирелеү (бирелеп китеү), мауығыу; **вда́ться в мечта́тельность** хыялға бирелеп китеү ♦ **вда́ться в кра́йности** бер сиктән икенсеһенә һуғылыу; **вда́ться в обма́н** алданыу; **вда́ться в подро́бности** энәһенән ебенә тиклем тикшереү (төпсөнөү)

**ВДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **вдви́нуть**

**ВДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вдви́нуться 2.** *страд. от* **вдвига́ть**

**ВДВИЖНО́Й,** -ая, -ое асылмалы; **вдвижно́й я́щик** асылмалы тартма

**ВДВИ́НУТЬ** *сов. что* шыуҙырып (этеп) индереү

**ВДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* инеү, инеп китеү (*хәрәкәт иттереүҙән*)

**ВДВО́Е** *нареч.* **1.** ике тапҡыр, икеләтә; **вдво́е сильне́й** икеләтә көслөрәк; **вдво́е ме́ньше** ике тапҡыр кәмерәк **2.** икегә, урталай, (ҡап) уртаға; **сложи́ть вдво́е** икегә бөкләү

**ВДВОЁМ** *нареч.* икәүләп, икәү, икәүләшеп, икәү бергә; **жить вдвоём** икәүләп йәшәү

**ВДВОЙНЕ́** *нареч.* икеләтә, ике тапҡыр; **заплати́ть вдвойне́** икеләтә түләү

**ВДЕВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күҙәүле; **вдева́льная игла́** күҙәүле энә

**ВДЕВА́НИЕ** *с см.* **вдева́ть**; **вдева́ние ни́тки в иглу́** энәгә еп үткәреү

**ВДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **вдеть**

**ВДЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вде́ться 2.** *страд. от* **вдева́ть**

**ВДЕ́ВЯТЕРО** *нареч.* туғыҙ тапҡыр (мәртәбә), туғыҙ ҡат, туғыҙлата; **вде́вятеро бо́льше** туғыҙ тапҡыр артыҡ

**ВДЕВЯТЕРО́М** *нареч.* туғыҙыбыҙ бергә, туғыҙлап; **мы вдевятеро́м** беҙ туғыҙыбыҙ бергә

**В-ДЕВЯ́ТЫХ** *вводн. сл.* туғыҙынсынан

**ВДЕ́ЛАТЬ** *сов. что, во что* (*вставить внутрь, закрепив*) ҡуйыу, индереп нығытыу, индереп беркетеү; **вде́лать ка́мень в кольцо́** йөҙөккә ҡаш ҡуйыу

**ВДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **вде́лать**

**ВДЕ́ЛЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вде́лывать**

**ВДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **вдёрнуть**

**ВДЁРГИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вдёргивать**

**ВДЁРНУТЬ** *сов. что, во что* (эскә) тартып үткәреү; **вдёрнуть шнурки́ в боти́нки** ботинкаға бау тартып үткәреү

**ВДЁРНУТЬСЯ** *сов.* (эскә) тартып үткәрелеү

**ВДЕ́СЯТЕРО** *нареч.* ун тапҡыр (мәртәбә), ун ҡат, унлата; **вде́сятеро бо́льше** ун тапҡыр артыҡ

**ВДЕСЯТЕРО́М** *нареч.* унаулап, унауыбыҙ, унбыҙ бергә

**В-ДЕСЯ́ТЫХ** *вводн. сл.* унынсынан

**ВДЕТЬ** *сов. что, во что* үткәреү, кейҙереү, һаплау, күҙләү; **вдеть ни́тку в иглу́** энәнең күҙәүенә еп үткәреү, энә һаплау (һабаҡлау)

**ВДЕ́ТЬСЯ** *сов.* үткәрелеү, кейҙерелеү, һапланыу, күҙләнеү

**ВДОБА́ВОК** *нареч.*; *разг.* өҫтәүенә, шуның өҫтөнә, етмәһә

**ВДОВЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* тол ҡалыу

**ВДОВЕ́Ц** *м* тол ир; **вдова́** *ж* тол ҡатын ♦ **соло́менная вдова́** *шутл.* иренән ваҡытлыса айырылып торған ҡатын

**ВДО́ВИЙ,** -ья, -ье тол ҡатын ...ы; **вдо́вья жизнь** тол ҡатын тормошо

**ВДО́ВОЛЬ** *нареч.*; *разг.* **1.** (*до полного удовлетворения*) туйғансы, теләгәнсе, етерлек, танһыҡ ҡанғансы; **мы вдо́воль нае́лись я́год** беҙ туйғансы еләк ашаныҡ **2.** *в знач. сказ.* мул, етерлек, етеш, күп; **у нас всего́ вдо́воль** беҙҙә бөтәһе лә етерлек

**ВДОВСТВО́** *с* толлоҡ, тол йәшәү

**ВДО́ВСТВОВАТЬ** *несов.* тол ҡалыу, тол йәшәү

**ВДО́ВУШКА** *ж*; *разг., ласк. от* **вдова́** тол ҡатынҡай

**ВДО́ВЫЙ,** -ая тол, тол йәшәүсе, тол ҡалған

**ВДОГО́НКУ** *нареч.*; *разг.* артынан, артынан баҫтырып (ҡыуып); **кри́кнуть вдого́нку** артынан ҡыҫҡырыу; **побежа́ть вдого́нку** артынан баҫтырыу

**ВДОЛБИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вбить*) ҡағып индереү **2.** *кому*; *перен., прост.* төшөндөрөү, аңлатыу, тыҡыу, тылҡыу

**ВДОЛЬ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* буйға, буйына; **раска́лывать бревно́ вдоль** бүрәнәне буйға ярыу **2.** *предлог с род. п.* буйлап, буйынса; **вдоль реки́** йылға буйлап; **вдоль доро́ги** юл буйынан ♦ **вдоль и поперёк**: 1) (*во всех направлениях*) иңләп-буйлап, арҡырыһынан буйына; 2) (*до мельчайших подробностей*) энәһенән ебенә тиклем, үтәнән-үтәгә

**ВДОХ** *м* тын (һулыш) алыу; **сде́лать глубо́кий вдох** тәрән итеп тын алыу

**ВДОХНОВЕ́НИЕ** *с* илһам, ижади күтәренкелек, дәрт, рух; **рабо́тать с вдохнове́нием** илһам

менән эшләү; **трудово́е вдохнове́ние** хеҙмәт дәрте

**ВДОХНОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *высок.* **1.** (*исполненный вдохновения*) күтәренке рухлы, илһамлы, дәртле; **вдохнове́нное сло́во** күтәренке рухлы һүҙ; **вдохнове́нный труд** дәртле хеҙмәт **2.** (*выражающий вдохновение*) илһамлы, илһам сағылған; **вдохнове́нный взгляд** илһамлы ҡараш; **вдохнове́нное лицо́** илһам сағылған йөҙ

**ВДОХНОВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ВДОХНОВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* илһам биреүсе, дәртләндереүсе, рухландырыусы

**ВДОХНОВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*вызвать вдохновение*) рухландырыу, әҫәрләндереү, илһамландырыу; **вдохнови́ть слу́шателей** тыңлаусыларҙы рухландырыу **2.** *на что* (*побудить*) дәртләндереү, рухландырыу; **вдохнови́ть на по́двиг** батырлыҡҡа дәртләндереү

**ВДОХНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* рухланыу, илһамланыу, дәртләнеү, әҫәрләнеү

**ВДОХНОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вдохнови́ть**

**ВДОХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һулау, тын (һулыш) алыу; **вдохну́ть све́жий во́здух** саф һауа һулау **2.** *что, в кого-что; перен.* йәнләндереү, рухландырыу, уятыу, ҡуҙғатыу; **вдохну́ть бо́дрость** *в кого-л. бергәй кешене* йәнләндереп ебәреү; **вдохну́ть чу́вство го́рдости** ғорурлыҡ хисе уятыу

**ВДРЕ́БЕЗГИ** *нареч.* **1.** (*на мелкие части*) селпәрәмә; **вдре́безги разби́ть** селпәрәмә килтереү **2.** *разг.* (*совершенно, полностью*) тотош, тулыһынса, бөтөнләй; **вдре́безги проигра́ться** тулыһынса отолоу

**ВДРУГ** *нареч.* **1.** ҡапыл, кинәт, көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән; **вдругразда́лся вы́стрел** көтмәгәндә атыу тауышы яңғыраны **2.** *уст.* (*сразу, немедленно*) шунда уҡ; **не вдруг пришло́ реше́ние** шунда уҡ хәл ителмәне **3.** *разг.* (*разом, одновременно*) бер юлы, бер үк ваҡытта **4.** *в знач. частицы; разг.* (*а если, а что если*) әгәр -һа/-һә; **вдруг оши́блись?** әгәр яңылыш булып ҡуйһа?

**ВДРЫЗГ** *нареч.; прост. см.* **вдре́безги**

**ВДУВА́НИЕ** *с см.* **вдува́ть**

**ВДУВА́ТЬ** *несов. см.* **вдуть**

**ВДУВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **вдува́ть**

**ВДУ́МАТЬСЯ** *сов.* ентекләп (төптән) уйлау, төбөнә (айышына) төшөнөү; **вду́маться в смысл статьи́** мәҡәләнең айышына төшөнөү; **вду́маться в ска́занное** әйткәндәр тураһында уйланыу

**ВДУ́МЧИВО** *нареч.* төптән уйлап, тәрән, төшөнөп, төплө; **вду́мчиво изуча́ть класси́ческую литерату́ру** классик әҙәбиәтте төплө өйрәнеү

**ВДУ́МЧИВОСТЬ** *ж* төптән (тәрән) уйлау

**ВДУ́МЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ныҡ (ентекләп) уйланған, төптән (тәрән) уйлаусан, (төптән) уйлап эш итеүсән; **вду́мчивый отве́т** ентекләп уйланған яуап; **вду́мчивый рабо́тник** төптән уйлап эш итеүсән хеҙмәткәр **2.** (*выражающий вдумчивость*) уйсан; **вду́мчивое лицо́** уйсан йөҙ; **вду́мчивый взгляд** уйсан ҡараш

**ВДУ́МЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **вду́маться**

**ВДУ́НУТЬ** *сов. см.* **вдуть**

**ВДУТЬ** *сов. что* өрөү, өрөп тултырыу; **вдуть во́здух в рези́новый мяч** резина тупҡа һауа өрөп тултырыу

**ВДЫХА́НИЕ** *с см.* **вдыха́ть**

**ВДЫХА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һулыш (тын) алыу ...ы; **вдыха́тельный кла́пан противога́за** противогаздың тын алыу клапаны

**ВДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **вдохну́ть** 1

**ВДЫХА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **вдыха́ть**

**ВЕГЕТАРИА́НЕЦ** *м* вегетариансы, вегетариан (*итле аҙыҡ ашамаған кеше*)

**ВЕГЕТАРИА́НСКИЙ,** -ая, -ое итһеҙ аш; **вегетариа́нская столо́вая** итһеҙ аштар ашханаһы; **вегетариа́нский обе́д** итһеҙ төшкө аш

**ВЕГЕТАРИА́НСТВО** *с* вегетарианлыҡ (*һөттән, йәшелсәнән әҙерләнгән аш менән генә туҡланыу системаһы*)

**ВЕГЕТАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *биол.* вегетатив; **вегетати́вные о́рганы** вегетатив органдар (*үҫемлектәрҙә үҫеү һәм туҡланыу органдары*) ♦ **вегетати́вное размноже́ние** вегетатив үрсеү; **вегетати́вная не́рвная систе́ма** *физиол.* вегетатив нерв системаһы

**ВЕГЕТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *бот.* вегетация; **вегетацио́нный пери́од** вегетация осоро

**ВЕГЕТА́ЦИЯ** *ж; бот.* вегетация (*үҫемлектәрҙең үҫеү, үрсеү процесы*)

**...ВЕ́Д** *м* (*урыҫ телендәге ҡушма исемдәрҙең икенсе өлөшө, "белгес" мәғәнәһендә*); **востокове́д** шәрҡиәтсе, шәреҡ белгесе; **литературове́д** әҙәбиәтсе, әҙәбиәт белгесе; **языкове́д** телсе, тел белгесе

**ВЕ́ДАТЬ** *несов.* **1.** *что; уст.* (*знать, иметь сведения*) белеү, танып белеү, хәбәрҙар булыу; **ве́дать исто́рию семьи́** ғаилә тарихын белеү **2.** (*с отрицанием "не"*) белмәү; **не ве́дает, что твори́т** нимә эшләгәнен белмәй **3.** *что* (*испытывать, чувствовать*) тойоу, һиҙеү, белеү; **она́ не ве́дала колеба́ний** ул икеләнеү тойманы **4.** *чем* (*заведовать, управлять*) алып барыу, идара итеү, етәкселек итеү, башҡарыу; **ве́дать хозя́йством** хужалыҡ менән идара итеү

**ВЕ́ДЕНИЕ** *с* идара (етәкселек) итеү, ҡарамағында булыу, ҡарамағында тороу, ҡарамағына алыу; **находи́ться в ве́дении руно́** руно ҡарамағында булыу; **принима́ть в своё ве́дение** үҙ ҡарамағыңа алыу

**...ВЕ́ДЕНИЕ** *с* (*урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең фән һәм уның тармаҡтарының исемен белдергән икенсе өлөшө*); **востокове́дение** шәрҡиәт; **языкове́дение** тел ғилеме; **обществове́дение** йәмғиәт ғилеме

**ВЕДЕ́НИЕ** *с см.* **вести́** 1, 3, 7; **веде́ние хозя́йства** хужалыҡ менән идара итеү; **веде́ние со-**

**бра́ния** йыйылышты алып барыу; **веде́ние протоко́ла** протокол алып барыу (яҙыу)

**ВЕДЁРКО** *с*; *разг.*, *уменьш. от* **ведро́** 1 бәләкәй биҙрә (күнәк)

**ВЕДЁРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** биҙрә ...ы; **ведёрная ру́чка** биҙрә тотҡаһы **2.** (*вместимостью в одно ведро*) бер биҙрәлек, бер биҙрә һыйышлы; **ведёрная бо́чка** бер биҙрә һыйышлы мискә

**ВЕДЁРЦЕ** *с*; *уменьш. от* **ведро́** 1 бәләкәй биҙрә (күнәк)

**ВЕ́ДОМО** *вводн. сл.*; *уст.* билдәле, әлбиттә

**ВЕ́ДОМОСТЬ** *ж* **1.** ведомость, исемлек; **расчётная ве́домость** иҫәп-хисап исемлеге **2.** *мн.* **ве́домости** ведомостар; **"Ве́домости Верхо́вного Сове́та СССР"** "СССР Юғары Советы ведомостары"

**ВЕ́ДОМСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ведомство ...ы, ведомствоға ҡараған; **ве́домственные архи́вы** ведомство архивтары **2.** ведомствосылыҡ ...ы, ведомство мәнфәғәтен тотоуға нигеҙләнгән; **ве́домственный подхо́д к вопро́су** мәсьәләгә ведомствосылыҡ ҡарашы

**ВЕ́ДОМСТВО** *с* ведомство, идара (*дәүләт идараһының һәм уны хеҙмәтләндереүсе учреждениелар системаһының тармағы*); **тамо́женное ве́домство** таможня ведомствоһы; **вое́нное ве́домство** хәрби идара

**ВЕ́ДОМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *кому* билдәле; **вся́кому ве́домо** һәр кемгә билдәле **2.** *в знач. сущ.* **ве́домо** *с в выражениях*: 1) **с ве́дома** *чьего кемдеңдер* рөхсәте (ризалығы) менән; 2) **без ве́дома** *чьего кемдеңдер* рөхсәтенән (ризалығынан) башҡа, ризалыҡһыҙ

**ВЕДО́МЫЙ,** -ая, -ое *уст.* **1.** *прич. от* **вести́** **2.** *прил.* (*такой, который следует за ведущим*) эйәреүсе, эйәртелеүсе; **ведо́мый самолёт** эйәреүсе самолёт **3.** *в знач. сущ.* **ведо́мый** *м* эйәреүсе **4.** *прил.*; *тех.* (*приводимый в движение ведущим*) йөрөтөлөүсе, хәрәкәткә килтерелеүсе; **ведо́мое колесо́** йөрөтөлөүсе тәгәрмәс

**ВЕ́ДРЕННЫЙ,** -ая, -ое *уст.*, *прост.* сыуаҡ, салт аяҙ, ҡояшлы; **ве́дренный день** салт аяҙ (ҡояшлы) көн

**ВЕДРО́** *с* **1.** биҙрә, күнәк **2.** *уст.* (*мера жидкости около 12 л*) бер биҙрә, бер күнәк ♦ **дождь льёт как из ведра́** ямғыр ҡойоп яуа, ямғыр биҙрәнән ҡойған кеүек яуа

**ВЁДРО** *с*; *уст.*, *прост.* салт аяҙ, ҡояшлы көн, сыуаҡ

**ВЕДУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **вести́** **2.** *прил.* (*головной*) иң башта барыусы, алып барыусы, башлап барыусы; **веду́щий самолёт** иң башта барыусы самолёт **3.** *в знач. сущ.* **веду́щий** *м* и **веду́щая** *ж* алып барыусы, етәксе; **оцени́ть своего́ веду́щего** үҙеңдең етәксеңде баһалау **4.** *прил.*; *перен.* (*главный, руководящий*) төп, етәксе; **веду́щая о́трасль промы́шленности** сәнәғәттең төп тармағы; **игра́ть веду́щую роль** төп роль уйнау **5.** *прил.*; *тех.* йөрөтөүсе, хәрәкәтләндереүсе, хәрәкәткә килтереүсе; **веду́щее колесо́** йөрөтөүсе тәгәрмәс

**ВЕДЬ** *союз* и *частица* ла/лә баһа, бит; **ведь он ещё бо́лен** ул ауырыу ҙа баһа; **ведь это всем изве́стно** был бөтәһенә лә билдәле бит; **вот ведь как интере́сно** бына нисек ҡыҙыҡ икән дә баһа; **ведь вы бы́ли пра́вы** һеҙ хаҡлы инегеҙ ҙә баһа

**ВЕ́ДЬМА** *ж* **1.** убырлы ҡарсыҡ, сихырсы ҡарсыҡ **2.** *перен.*, *бран.* (*злая женщина*) уҫал (яуыз) ҡатын

**ВЕ́ЕР** *м* **1.** веер, елпеүес (*ҡош ҡауырһынынан ярым түңәрәк итеп яһалған елпеүес*); **обма́хиваться ве́ером** елпеүес менән елпенеү **2.** *в знач. нареч.* **ве́ером** ярым түңәрәк яһап; **расположи́ть ве́ером** ярым түңәрәк яһап урынлаштырыу

**ВЕ́ЕРНЫЙ,** -ая, -ое елпеүес һымаҡ; **ве́ерные ли́стья** елпеүес (һымаҡ) япраҡтар

**ВЕЕРООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое елпеүескә оҡшаш

**ВЕ́ЖДЫ** *мн.* (*ед.* **ве́жда** *ж*); *уст.*, *трад.-поэт.* **1.** күҙ ҡабаҡтары **2.** күҙҙәр

**ВЕ́ЖЛИВОСТЬ** *ж* әҙәплелек, әҙәп, ихтирамлылыҡ, ихтирам; **визи́т ве́жливости** ихтирам йөҙөнән килеү; **предупреди́тельная ве́жливость** иғтибарлы әҙәплелек

**ВЕ́ЖЛИВЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, ихтирамлы, түбәнселекле; **ве́жливый челове́к** әҙәпле кеше; **ве́жливый тон** ихтирамлы тон

**ВЕЗДЕ́** *нареч.* бөтә (бөтөн) ерҙә (урында), һәр ерҙә (урында), һәр ҡайҙа; **везде́ и всю́ду** һәр ерҙә, бөтә урында

**ВЕЗДЕСУ́ЩИЙ,** -ая, -ее бөтә ергә лә (бөтәһенә лә) етешеүсе, бөтәһенә лә ҡатнашыусы, бөтәһенә лә тығылыусы, өлгөр; **вездесу́щие репортёры** бөтәһенә лә (бөтөнөһөнә лә) етешеүсе, өлгөр репортёрҙар

**ВЕЗДЕХО́Д** *м* вездеход (*теләһә ниндәй юлдан йөрөй ала торған автомашина*)

**ВЕЗЕ́НИЕ** *с*; *разг.* яйы килеү, яйы (уңайы) килеп тороу, уңышлы килеп сығыу, уңыу

**ВЕЗТИ́** *несов.* **1.** *кого-что* тартыу, йөрөтөү (*тейәп, ултыртып*), алып барыу (ҡайтыу), тартып алып барыу, илтеү; **везти́ груз на парохо́де** йөктө пароходта алып барыу; **везти́ на теле́жках** бәләкәй арбаларҙа алып барыу **2.** *кому безл.*; *разг.* (*об удаче*) яйы (уңайы) килеп тороу, уңайлы килеп сығыу, эше уңыу, уңышлы барыу (булыу); **ему́ везёт на охо́те** уның һунары уңышлы була; **ему́ в жи́зни всегда́ везёт** уның бәхете бар, уға тормошта һәр ваҡыт уңайы килеп тора ♦ **везти́ на себе́** йөктөң ауырын үҙең тартыу; **везёт как уто́пленнику** бәхетһеҙгә ел ҡаршы

**ВЕЗТИ́СЬ** *несов. страд. от* **везти́** 1

**ВЕЗУ́ЧИЙ,** -ая, -ее эше (юлы) уңыусан, даланлы; **везу́чий челове́к** даланлы кеше

**ВЕК** *м* **1.** быуат, йөҙ йыл; **двадца́тый век** егерменсе быуат; **в про́шлом ве́ке** үткән быуатта

**2.** (*эпоха*) дәүер, быуат; **ка́менный век** таш быуат; **сре́дние века́** урта быуаттар **3.** (*жизнь*) ғүмер; **на моём веку́** минең ғүмеремдә; **прожи́ть свой век** үҙ ғүмерендә йәшәү **4.** *разг.* (*вечность*) оҙаҡ (күп) ваҡыт; **века́ прошли́** бик күп ваҡыттар үтте **5.** *в знач. нареч.*; *разг.* (*всегда, вечно*) һәр ваҡыт, ғүмер буйына, гел; **век слу́шать** һәр ваҡыт тыңлау; **век до́ма сиде́ть** ғүмер баҡый өйҙә ултырыу ♦ **ве́ки ве́чные** иҫ китмәле (бик) оҙаҡ; **на ве́ки ве́чные** мәңгегә, ғүмергә, бөтөнләйгә; **во ве́ки веко́в** *уст.* ғүмергә, ғүмер буйына, ғүмер-ғүмергә, мәңгегә, һәр ваҡыт, гел; **в ко́и ве́ки** ҡасандан бирле, бик һирәк; **испоко́н (споко́н) ве́ку (веко́в)** элек-электән, бик күптән, борон-борондан, әүәл-әүәлдән

**ВЕ́КИ** *мн.* (*ед.* **ве́ко** *с*) күҙ ҡабағы; **ве́рхние ве́ки** күҙҙең өҫкө ҡабаҡтары

**ВЕКОВА́ТЬ** *несов.*; *разг.* ғүмер итеү, ғүмер һөрөү, йәшәү; **бобылём векова́ть** япа-яңғыҙ йәшәү ♦ **век векова́ть** *фольк.* ғүмер итеү, ғүмер һөрөү, йәшәү

**ВЕКОВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое мәңгелек, ғүмерлек, борондан (ғүмер-ғүмергә, элек-электән) килгән

**ВЕКОВО́Й,** -ая, -ое **1.** бик ҡарт (*күп йәшәгән*); **веково́й дуб** бик ҡарт (йөҙйәшәр) имән **2.** боронғо, быуаттар буйына (элек-электән) килгән; **вековы́е обы́чаи** боронғо ғөрөф-ғәҙәттәр; **вековы́е ча́яния наро́дов** халыҡтарҙың элек-электән килгән өмөтө

**ВЕКСЕЛЕДА́ТЕЛЬ** *м* вексель биреп тороусы, вексель биреүсе

**ВЕКСЕЛЕДЕРЖА́ТЕЛЬ** *м* вексель тотоусы

**ВЕ́КСЕЛЬ** *м* вексель (*кемгә булһа ла билдәле ваҡыт эсендә аҡса түләргә бирелгән яҙма йөкләмә*); **уплати́ть по ве́кселю** вексель буйынса түләү

**ВЕ́КСЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое вексель ...ы; **ве́ксельный курс** вексель курсы; **ве́ксельное пра́во** вексель хоҡуғы

**ВЕ́КТОР** *м*; *мат.* вектор (*билдәле урыны һәм йүнәлеше булған тура һыҙыҡ*)

**ВЕ́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое *мат.* вектор ...ы; **ве́кторная величина́** вектор дәүмәле ♦ **ве́кторное исчисле́ние** вектор иҫәпләүҙәре

**ВЕЛЕ́НЕВЫЙ: веле́невая бума́га** велен ҡағыҙ (*юғары сортлы ҡаты ҡағыҙ*)

**ВЕЛЕ́НИЕ** *с* бойороҡ, әмер, фарман, ҡушыу; **по веле́нию вре́мени** ваҡыт ҡушыуы буйынса ♦ **по щу́чьему веле́нию** бер кем дә ҡыҫылмайынса, үҙенән-үҙе, тылсым көсө менән

**ВЕЛЕРЕЧИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *книжн.*, *уст.*, *ирон.* күп һүҙле, оҫта телле; **велеречи́вый челове́к** оҫта телле кеше

**ВЕЛЕ́ТЬ** *сов.*, *несов. кому-чему, что* ҡушыу, бойороу, әмер биреү; **се́рдце вели́т** йөрәк ҡуша; **веле́ть яви́ться** килергә ҡушыу ♦ **веле́ть до́лго жить** үлеү

**ВЕЛИКА́Н** *м* алпамыша, ҙур кәүҙәле кеше

**ВЕЛИ́КИЙ,** -ая, -ое **1.** ҙур, оло, ныҡ; **вели́кая ра́дость** ҙур шатлыҡ; **вели́кое зло** оло яуызлыҡ; **вели́кое удивле́ние** ныҡ аптырау **2.** ҙур, киң, иркен; **боти́нки велики́** ботинкалар ҙур **3.** бөйөк; **вели́кая держа́ва** бөйөк держава; **вели́кий учёный** бөйөк ғалим; **вели́кий полково́дец** бөйөк полководец **4.** (*в составе различных названий и терминов*) бөйөк; **Вели́кое кня́жество Влади́мирское** Бөйөк Владимир кенәзлеге ♦ **вели́кое мно́жество** икһеҙ-сикһеҙ күп; **(не) велика́ ва́жность (беда́)** әһәмиәте юҡ, аптырарлыҡ (бошонорлоҡ) түгел, иҫ китәрлек түгел, артыҡ зыяны юҡ; **от ма́ла до вели́ка** йәше-ҡарты, олоһо-кесеһе

**ВЕЛИКОВО́ЗРАСТНЫЙ** и *уст.* **ВЕЛИКОВОЗРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое йәше уҙған (үткән), оло йәштәге; **великово́зрастный учени́к** (уҡыуҙан) йәше уҙған уҡыусы

**ВЕЛИКОДЕРЖА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* бөйөк держава ...ы; **великодержа́вная си́ла** бөйөк держава көсө **2.** (*стремящийся к господству над более слабыми*) бөйөк держава ...ы; **великодержа́вные наро́ды** бөйөк держава халыҡтары ♦ **великодержа́вный шовини́зм** бөйөк державасылыҡ шовинизмы

**ВЕЛИКОДУ́ШИЕ** *с* киң (хуш) күңеллелек, миһырбанлылыҡ, мөрәүәт; **он явля́ется образцо́м великоду́шия** ул киң күңеллелек өлгөһө булып тора

**ВЕЛИКОДУ́ШНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* киң (хуш) күңеллелек күрһәтеү, киң күңеллелек күрһәтеп маташыу

**ВЕЛИКОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** киң (хуш) күңелле, миһырбанлы, мөрәүәтле; **великоду́шный челове́к** киң күңелле кеше **2.** (*продиктованный великодушием*) киң күңелдән, ихлас эшләнгән; **великоду́шный посту́пок** ихлас эшләнгән эш

**ВЕЛИКОЛЕ́ПИЕ** *с* күркәмлек, гүзәллек, зиннәтлелек

**ВЕЛИКОЛЕ́ПНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*роскошный*) күркәм, гүзәл, бик матур, зиннәтле; **великоле́пный дворе́ц** күркәм (зиннәтле) һарай; **великоле́пный вид** бик матур ҡиәфәт **2.** *разг.* (*отличный*) бик шәп, бына тигән, бик яҡшы, бик һәйбәт; **великоле́пный певе́ц** бик шәп йырсы

**ВЕЛИКОРУ́ССКИЙ,** -ая, -ое *уст.* великорус ...ы; **великору́сские го́воры** великорус һөйләштәре

**ВЕЛИКОРУ́СЫ** *мн.* (*ед.* **великору́с** *м*); *уст.* великорустар (*урыҫтарҙың элекке исеме*)

**ВЕЛИКОСВЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое *уст.* аҡһөйәктәр ...ы, юғары синыфтар ...ы; **великосве́тский сало́н** аҡһөйәктәр салоны

**ВЕЛИ́КОСТЬ** *ж*; *книжн.*, *уст.* әһәмиәтлелек, мөһимлек

**ВЕЛИЧА́ВОСТЬ** *ж* мөһабәтлек, олпатлылыҡ, тантаналылыҡ



5 зак. 2.0084.05

**ВЕЛИЧА́ВЫЙ,** -ая, -ое мөһабәт, олпатлы, тантаналы, мәғрур; **велича́вая мело́дия** тантаналы мелодия; **велича́вая по́ступь** мөһабәт аҙым; **велича́вые го́ры** мәғрур тауҙар

**ВЕЛИЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (*уважаемый, почтительный, прославляемый*) ихтирамлы, хөрмәтләү(се), данлаусы; **велича́льный обря́д** хөрмәтләү йолаһы; **велича́льная пе́сня** данлаусы йыр

**ВЕЛИЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, кем-чем* хөрмәтләп (ихтирам менән) атау (исемләү), ололап әйтеү; **велича́ть профе́ссором** профессор тип атау; **велича́ть по ба́тюшке** атаһының исеме менән ололап әйтеү **2.** *кого* (*чествовать песнями*) хөрмәтләп йырлау, арнап йырлау; **велича́ть наречённых** йәрәшелгәндәрҙе хөрмәтләп йырлау

**ВЕЛИ́ЧЕСТВЕННОСТЬ** *ж* мөһабәтлек, бөйөклөк; **вели́чественность зда́ния** йорттоң мөһабәтлеге

**ВЕЛИ́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое мөһабәт, бөйөк; **вели́чественный вид** мөһабәт күренеш

**ВЕЛИ́ЧЕСТВО** *с*; *уст.* ғали йәнәптәре

**ВЕЛИ́ЧИЕ** *с* бөйөклөк, ололоҡ, ҙурлыҡ; **вели́чие по́двига** батырлыҡтың бөйөклөгө ♦ **во всём (своём) вели́чии** үҙенең бөтә матурлығында (күркәмлегендә); **с высоты́ своего́ вели́чия** үҙ бейеклегенән, өҫтөнлөк менән

**ВЕЛИЧИНА́** *ж* **1.** (*размер, объём*) күләм, ҙурлыҡ; **величина́ ко́мнаты** бүлмәнең ҙурлығы; **изме́рить величину́** *чего-л. нимәнеңдер* ҙурлығын үлсәү **2.** *мат., физ.* дәүмәл, ҙурлыҡ; **бесконе́чно ма́лая величина́** сикһеҙ бәләкәй дәүмәл; **неизве́стная величина́** билдәһеҙ дәүмәл; **постоя́нная величина́** даими дәүмәл, үҙгәрмәүсән дәүмәл **3.** *перен.* (*о человеке*) атаҡлы (күренекле) кеше; **он кру́пная величина́ в нау́ке** ул фәндә күренекле кеше

**ВЕЛОГО́НКА** *ж* велосипед ярышы; **весе́нние велого́нки** яҙғы велосипед ярышы

**ВЕЛОГО́НЩИК** *м* велосипедта ярышыусы

**ВЕЛОДРО́М** *м* велодром (*велосипедта ярышыу майҙаны*)

**ВЕЛОЗАВО́Д** *м* велосипед заводы

**ВЕЛОСИПЕ́Д** *м* велосипед

**ВЕЛОСИПЕДИ́СТ** *м* и **ВЕЛОСИПЕДИ́СТКА** *ж* велосипедсы

**ВЕЛОСИПЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое велосипед ...ы; **велосипе́дные го́нки** велосипед ярыштары

**ВЕЛЬБО́Т** *м*; *мор.* вельбот (*ишкәкле һәм елкәнле ҙур оҙон кәмә*)

**ВЕЛЬВЕ́Т** *м* вельвет (*туҡыма*)

**ВЕЛЬВЕ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** вельвет ...ы, вельвет; **вельве́товое произво́дство** вельвет етештереү **2.** вельвет, вельветтан тегелгән; **вельве́товый костю́м** вельвет костюм

**ВЕЛЬМО́ЖА** *м* **1.** *уст.* вельможа (*атаҡлы нәҫелдән сыҡҡан бай түрә*) **2.** *ирон.* үҙен эллә кемгә ҡуйған кеше

**ВЕЛЬМО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** вельможа булған, ҙур түрә булған, вельможа; **вельмо́жный боя́рин** вельможа баяр **2.** вельможаларға (ҙур түрәләргә) хас; **вельмо́жная оса́нка** вельможаларға хас килбәт (ҡиәфәт)

**ВЕЛЮ́Р** *м* велюр (*махсус эшкәртелгән бүҫтау йәки фетр*)

**ВЕ́НА** *ж* вена, ҡан тамыры (*йөрәккә ҡан йөрөтөүсе тамыр*); **расшире́ние вен** *мед.* веналар(ҙың) киңәйеүе

**ВЕНГЕРКА I** *ж см.* **ве́нгры**

**ВЕНГЕ́РКА II** *ж* венгерка (*бейеү һәм уға яҙылған музыка әҫәре*)

**ВЕНГЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое венгр(ҙар) ...ы, Венгрия ...ы; **венге́рский язы́к** венгр теле

**ВЕ́НГРЫ** и *уст.* **ВЕНГЕ́РЦЫ** *мн.* венгрҙар, мадъярҙар, венгр халҡы, мадъяр халҡы // *ед.* **венгр** и **венге́рец** *м* венгр ир-аты; **венге́рка** *ж* венгр ҡатын-ҡыҙы

**ВЕНЕ́РИК** *м*; *разг.* венерик (*венерик ауырыу менән сирләүсе*)

**ВЕНЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* венерик; **венери́ческие боле́зни** венерик ауырыуҙар

**ВЕНЕРО́ЛОГ** *м*; *мед.* венеролог (*венерик ауырыуҙар врачы*)

**ВЕНЕРОЛО́ГИЯ** *ж*; *мед.* венерология (*медицинаның венерик ауырыуҙарҙы өйрәнеү бүлеге*)

**ВЕНЕ́Ц** *м* **1.** *уст., трад.-поэт.* венок; **терно́вый вене́ц** сәнскеле венок **2.** *уст.* (*драгоценный головной убор*) таж; **ца́рский вене́ц** батша тажы **3.** *церк.* венок (*йәрәшеү йолаһын үтәгәндә башҡа кейҙерелгән венок*) **4.** *разг.* (*бракосочетание*) никах, никах йолаһы; **до венца́** никахҡа тиклем; **по́сле венца́** никахтан һуң **5.** *перен.* (*последняя, высшая ступень*) һуңғы (юғары) баҫҡыс; **вене́ц творе́ния** ижадтың һуңғы баҫҡысы **6.** *астр.* шаңдаҡ; **вене́ц вокру́г луны́** ай әйләнәһендәге шаңдаҡ **7.** ниргә (*бураның бер ҡат бүрәнәһе*) ♦ **идти́ под вене́ц** *уст.* кейәүгә сығыу, өйләнешеү

**ВЕНЕЦИА́НСКИЙ,** -ая, -ое Венеция ...ы ♦ **венециа́нское окно́** өс өлөштән торған ҙур тәҙрә (*урта күҙгәнәге ҙур, ә ике яҡ ситтәгеһе ярым күҙгәнәктәрҙән тора*)

**ВЕНЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** таж ...ы; **вене́чные украше́ния** таж биҙәктәре **2.** ниргә ...ы (*бурала*); **вене́чная скоба́** ниргә атламаһы **3.** *анат.* коронар; **вене́чные сосу́ды** коронар тамырҙар

**ВЕ́НЗЕЛЬ** *м* вензель (*исем менән фамилияның йәки ике исемдең баш хәрефтәренең семәрләп бергә яҙылышы*) ♦ **писа́ть вензеля́** алпан-толпан баҫып, бәүелеп атлау (*иҫерек кеше тураһында*)

**ВЕ́НИК** *м* миндек

**ВЕНО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое вена ...ы; **вено́зная кровь** вена ҡаны

**ВЕНО́К** *м* венок (*сәскә йәки япраҡтан түңәрәкләп үрелгән бәйләм*); **лавро́вый вено́к** лавр веногы

**ВЕ́НТЕРЬ** *м*; *рыб.* тоҡ ау (*балыҡ тотоу ҡоралы*)

**ВЕНТИЛИ́РОВАТЬ** *несов. что* **1.** елләтеү, һауа алмаштырыу, вентиляция яһау; **вентили́ровать помеще́ние** бинаны елләтеү, бинаның һауаһын алмаштырыу **2.** *перен.*, *прост.* (*обсуждать*) тикшереп ҡарау, асыҡлап ҡарау; **вентили́ровать вопро́с** мәсьәләне тикшереп ҡарау

**ВЕНТИЛИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*проветриваться*) елләтеү **2.** *страд. от* **вентили́ровать**

**ВЕ́НТИЛЬ** *м* вентиль (**1.** *тех. шыйыҡса, пар, газ ағымын көйләү һәм ябыу ҡулайламаһы, клапан* **2.** *муз. тынлы музыка ҡоралдарында тауыш юғарылығын көйләүсе клапан*)

**ВЕНТИЛЯ́ТОР** *м* вентилятор, елләткес

**ВЕНТИЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое вентиляция ...ы; **вентиляцио́нная труба́** вентиляция торбаһы

**ВЕНТИЛЯ́ЦИЯ** *ж* **1.** елләтеү, һауа алмаштырыу **2.** *тех.* вентиляция (*елләтеү, һауа алмаштырыу приборҙары*)

**ВЕНЦЕНО́СЕЦ** *м*; *высок.*, *уст.* батша, монарх

**ВЕНЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** никах ...ы; **венча́льный обря́д** никах йолаһы **2.** никах ...ы, никах өсөн тәғәйенләнгән; **венча́льное пла́тье** никах күлдәге

**ВЕНЧА́НИЕ** *с* **1.** *ист.* (*коронование*) таж кейҙереү (*тәхеткә ултыртыу йолаһы*) **2.** никахлау, никах йолаһын үткәреү

**ВЕНЧА́ТЬ 1.** *сов.*, *несов. кого-что*; *уст.*, *поэт.* таж кейҙереү, бүләкләү; **венча́ть геро́я лавро́вым венко́м** батырға лавр тажы кейҙереү **2.** *несов. что* (*находиться наверху*) осланыу, осонда булыу, осонда тороу; **ба́шню венча́ла звезда́** манараның осонда йондоҙ тора **3.** *несов. что*; *перен.* (*успешно завершать*) тамамлау, теүәлләү, уңышлы килеп сығыу; **коне́ц венча́ет де́ло** эште унының аҙағы биҙәй; эштең уңышы — тамамланыуында **4.** *сов.*, *несов. кого*; *церк.* (*совершать обряд бракосочетания*) никах уҡыу, никахлау ♦ **венча́ть на ца́рство** тәхеткә ултыртыу йолаһын уҙғарыу, тәхеткә ултыртыу, таж кейҙереү

**ВЕНЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (таж, сәскә менән) биҙәлеү, таж кейҙерелеү; **пра́здник венча́лся ро́зами** байрам розалар менән биҙәлде **2.** (*вступать в брак*) никахланыу, никахлашыу **3.** *чем* (*заканчиваться, завершаться наверху*) осланыу, тамамланыу **4.** *страд. от* **венча́ть**

**ВЕ́НЧИК** *м* (*часть цветка*) таж

**ВЕПРЬ** *м* ҡабан, ҡырағай сусҡа, ҡыр сусҡаһы

**ВЕ́ПССКИЙ,** -ая, -ое вепс(тар) ...ы; **ве́псский язы́к** вепс теле

**ВЕ́ПСЫ** *мн.* (*ед.* **вепс** *м*) вепстар, вепс халҡы (*Карелияла, Вологда, Ленинград өлкәләрендә йәшәүсе халыҡ*) // *ед.* **вепс** *м* вепс ир-аты

**ВЕ́РА** *ж* **1.** ышаныс, ышаныу, инаныс; **ве́ра в люде́й** кешеләргә ышаныс; **ве́ра в успе́х де́ла** эштең уңышына ышаныу **2.** дин, иман; **мусульма́нская ве́ра** мосолман дине **3.** *уст.*, *разг.* (*доверие*) ышаныс; **вы́йти из ве́ры** ышаныстан сығыу ♦ **служи́ть ве́рой и пра́вдой** *уст.* тоғро хеҙмәт итеү; **приня́ть на ве́ру** ышанып ҡабул итеү

**ВЕРА́НДА** *ж* веранда; **застеклённая вера́нда** быялаланған веранда

**ВЕ́РБА** *ж* ҡыҙыл тал, ҡоба тал

**ВЕРБА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* вербаль, телдән ♦ **верба́льная но́та** *дип.* вербаль нота (*ҡул ҡуйылмаған дипломатик нота, телдән әйтелгән белдереү менән бер дәрәжәлә йөрөй*)

**ВЕРБЕ́НА** *ж* вербена (*декоратив үҫемлек*)

**ВЕРБЛЮ́Д** *м* дөйә; **верблю́дица** *ж* инә дөйә; **одного́рбый верблю́д** нар дөйә, бер үркәсле дөйә; **двуго́рбый верблю́д** ике үркәсле дөйә

**ВЕРБЛЮЖА́ТИНА** *ж*; *прост. см.* **верблю́жина** 1

**ВЕРБЛЮЖА́ТНИК** *м* дөйә ҡараусы (*эйәсе*)

**ВЕРБЛЮ́ЖИЙ,** -ья, -ье **1.** дөйә ...ы; **верблю́жья шерсть** дөйә йөнө; **верблю́жий горб** дөйә үркәсе **2.** дөйә йөнөнән эшләнгән, дөйә йөнөнән яһалған (һырылған); **верблю́жье одея́ло** дөйә йөнөнән һырылған юрған

**ВЕРБЛЮ́ЖИНА** *ж* **1.** дөйә ите **2.** дөйә тиреһе

**ВЕРБЛЮЖО́НОК** *м* бута, бутаҡан, дөйә балаһы

**ВЕРБОВА́ТЬ** *несов. кого-что* вербовкалау, вербовать итеү, эшкә яллау; **вербова́ть люде́й на стро́йку** кешеләрҙе төҙөлөшкә вербовкалау

**ВЕРБОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **вербова́ть**

**ВЕРБО́ВКА** *ж см.* **вербова́ть**

**ВЕРБО́ВЩИК** *м* вербовщик, вербовкалаусы, вербовать итеүсе, эшкә яллаусы

**ВЕРЁВКА** *ж* бау, арҡан ♦ **вить верёвки** *из кого см.* **вить**

**ВЕРЁВОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бау ...ы, арҡан ...ы; **верёвочное произво́дство** бау етештереү **2.** бау, арҡан, бауҙан яһалған, арҡандан яһалған; **верёвочная ле́стница** арҡан баҫҡыс

**ВЕРЕДИ́ТЬ** *несов. что*; *уст.* (*раздражать больное место*) ҡуҙғытыу, ярһытыу; **вереди́ть ра́ну** яраны ҡуҙғытыу

**ВЕРЕЗЖА́ТЬ** *несов.*; *прост.* сырылдау, сыйылдау

**ВЕРЕНИ́ЦА** *ж* теҙмә, төркөм; **верени́ца у́ток** өйрәктәр төркөмө; **верени́ца мы́слей** уйҙар теҙмәһе

**ВЕ́РЕСК** *м* арса

**ВЕ́РЕСКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** арса ...ы; **ве́ресковые за́росли** арса ҡыуаҡлыҡтары **2.** арса, арсанан яһалған; **ве́ресковая па́лка** арса таяҡ

**ВЕРЕТЕНО́** *с* **1.** орсоҡ **2.** *тех.* (*вращающаяся ось*) әйләнеүсе күсәр

**ВЕРЕЩА́НИЕ** *с* сырылдау, сыйылдау, сырылдау (сыйылдау) тауышы; **вереща́ние кузне́чиков** сиңерткәләр сырылдауы

**ВЕРЕЩА́ТЬ** *несов.* сырылдау, сыйылдау, сыр-сыулау, сырҡылдау; **сверчо́к верещи́т** өй сиңерткәһе сырылдай

**ВЕРЗИ́ЛА** *м* и *ж*; *разг.* һонтор (*оҙон, йәмһеҙ кәүҙәле кеше*)

**ВЕРИ́ТЕЛЬНЫЙ: вери́тельная гра́мота** *дип.* ышаныс грамотаһы (*дипломатик вәкилгә башҡа илгә ебәргәндә бирелә торған хөкүмәт документы*)

**ВЕ́РИТЬ** *несов.* **1.** *кому-чему*, *в кого*, *во что* ышаныу; **ве́рить в успе́х** уңышҡа ышаныу; **ве́рить в торжество́ справедли́вости** ғәҙеллектең еңеп сығыуына ышаныу; **ве́рить в наро́д** халыҡҡа ышаныу **2.** *кому* (*надеяться*) ышаныу, ышанып ҡарау, ышанып эш итеү; **ве́рить дру́гу** дуҫҡа ышаныу **3.** (*веровать*) дингә ышаныу (инаныу), дин тотоу ♦ **ве́рить на́ слово** тулыһынса, шикһеҙ, дәлилһеҙ ышаныу; **не ве́рить свои́м глаза́м (уша́м)** үҙ күҙеңә (ҡолағыңа) үҙең ышанмау

**ВЕ́РИТЬСЯ** *несов. безл.* ышанғы килеү, ышанып булыу, ышаныу; **не ве́рится, что он э́то сде́лал** уның быны эшләгәненә ышанғы килмәй; **ве́рится с трудо́м** ҡыйынлыҡ менән ышанып була

**ВЕ́РМАХТ** *м* вермахт (*фашистик Германияның ҡораллы көстәре*)

**ВЕРМИШЕ́ЛЬ** *ж* вермишель; **суп с вермише́лью** вермишель ашы

**ВЕ́РМУТ** *м* вермут (*шарап*)

**ВЕРНЕ́Е 1.** *сравн. ст. от* **ве́рный** и **ве́рно** ышаныслыраҡ, дөрөҫөрәк; **э́то реше́ние зада́чи верне́е** мәсьәләнең был сиселеше дөрөҫөрәк **2.** *в знач. вводн. сл.* (*точнее*, *правильнее*) дөрөҫөрәге, дөрөҫө, дөрөҫөн әйткәндә; **я написа́л докла́д, верне́е, те́зисы к докла́ду** мин доклад, дөрөҫөрәге, докладҡа тезистар яҙҙым

**ВЕ́РНО 1.** *нареч.* тоғро, тоғролоҡло, ғәҙел; **ве́рно служи́ть** тоғро хеҙмәт итеү **2.** *нареч.* (*правильно*) дөрөҫ, ысын; **часы́ иду́т ве́рно** сәғәт дөрөҫ йөрөй; **ве́рно найти́ интона́цию** дөрөҫ интонация табыу **3.** *в знач. вводн. сл.* моғайын, бәлки, ихтимал; **он, ве́рно, не придёт** моғайын, ул килмәҫ ♦ **с по́длинным ве́рно** төп нөсхәһенә тап килә (*документ раҫлағанда ҡулланыла*)

**ВЕРНОПО́ДДАННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* батшаға тоғро (булған), батшаға тоғро хеҙмәт итеүсе; **верноп́одданные дворя́не** батшаға тоғро дворяндар

**ВЕ́РНОСТЬ** *ж* **1.** тоғролоҡ, бирелгәнлек; **ве́рность ро́дине** ватанға тоғролоҡ; **ве́рность прися́ге** антҡа тоғролоҡ **2.** дөрөҫлөк; **ве́рность перево́да** тәржемәнең дөрөҫлөгө; **ве́рность реше́ния** ҡарарҙың дөрөҫлөгө

**ВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*отдать обратно*) кире (ҡайтарып) биреү, (кире) ҡайтарыу; **верну́ть кни́гу** китапты кире ҡайтарыу; **верну́ть долг** бурысты ҡайтарыу (биреү) **2.** (*получить обратно*) ҡайтарып алыу, кире алыу (ҡайтарыу), тергеҙеү; **верну́ть здоро́вье** сәләмәтлекте тергеҙеү; **про́шлого не верну́ть** үткәнде кире ҡайтарып булмай **3.** *кого-что* (*заставить вернуться*) кире бороу (ҡайтарыу), бороп ҡайтарыу; **верну́ть с доро́ги** юлдан кире бороу; **верну́ть люде́й** кешеләрҙе бороп ҡайтарыу

**ВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡайтыу, кире әйләнеп ҡайтыу, кире ҡайтыу, кире боролоу; **верну́ться с полдоро́ги** ярты юлдан әйләнеп ҡайтыу, ярты юлдан кире боролоу **2.** *к кому*; *перен.* (*вновь появиться*) яңынан, ҡайтанан; **ко мне верну́лось споко́йствие** мин яңынан тынысландым **3.** *к чему* (*вновь приняться за что-л. прежнее*) яңынан (ҡайтанан) туҡталыу, кире ҡайтыу, яңынан ҡайтыу (ҡуҙғатыу); **верну́ться к на́чатому разгово́ру** башланған һөйләшеүгә кире ҡайтыу

**ВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*преданный*) тоғро, тоғролоҡло, бирелгән, хыянатһыҙ; **ве́рная помо́щница** тоғро ярҙамсы; **ве́рные друзья́** тоғролоҡло дуҫтар **2.** (*надёжный*) ышаныслы, ныҡлы; **ве́рная опо́ра** ышаныслы терәк; **ве́рный спо́соб** ышаныслы ысул **3.** (*правильный*, *точный*) дөрөҫ, раҫ, хаҡ, аныҡ; **ве́рная мысль** дөрөҫ фекер; **ве́рное сло́во** раҫ һүҙ; **ве́рный перево́д** дөрөҫ тәржемә **4.** (*несомненный*, *бесспорный*) һис икеләнеүһеҙ, һис шикһеҙ, бәхәсһеҙ, теүәл; **со́рок-то лет ей ве́рных бу́дет** уға һис шикһеҙ ҡырҡ йәш булыр; **ве́рных пять мину́т прошло́** теүәл биш минут үтте **5.** кәрәкле, тейешле; **найти́ ве́рные интона́ции** тейешле интонациялар табыу **6.** (*меткий*, *точный*) ныҡ, ныҡлы, үткер, төҙ; **ве́рная рука́** ныҡлы ҡул; **ве́рный глаз** үткер күҙ **7.** (*неизбежный*) ҡотолғоһоҙ, шикһеҙ; **ве́рный вы́игрыш** шикһеҙ отош; **ве́рная ги́бель** ҡотолғоһоҙ һәләкәт

**ВЕ́РОВАНИЯ** *мн.* (*ед.* **ве́рование** *с*) **1.** (*убеждения*) ышаныс, инаныс; **мои́ ве́рования** минең инаныстарым **2.** дини ҡараш; **ве́рования дре́вних башки́р** боронғо башҡорттарҙың дини ҡараштары

**ВЕ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *в кого-что* ышаныу, ышанып ҡарау; **ве́ровать в свою́ правоту́** үҙеңдең дөрөҫлөгөңә ышаныу **2.** (*верить в Бога*) дини булыу, Аллаға инаныу (ышаныу)

**ВЕРОИСПОВЕ́ДАНИЕ** *с*; *рел.* дин, дин тотоу; **свобо́да вероиспове́дания** дин тотоу иреклеге; **исла́мское вероиспове́дание** ислам динен тотоу

**ВЕРОЛО́МНОСТЬ** *ж* мәкерлелек, хыянатсыллыҡ

**ВЕРОЛО́МНЫЙ,** -ая, -ое мәкерле, хыянатлы, хыянатсыл (рәүештә); **вероло́мное нападе́ние** хыянатсыл һөжүм; **вероло́мный челове́к** мәкерле кеше

**ВЕРОЛО́МСТВО** *с* мәкер, хыянат, монафиҡлыҡ

**ВЕРО́НИКА** *ж* юшан

**ВЕРООТСТУ́ПНИК** *м* и **ВЕРООТСТУ́ПНИЦА** *ж*; *уст.* диндән яҙған, мөртәт

**ВЕРООТСТУ́ПНИЧЕСТВО** *с*; *уст.* диндән яҙыу, мөртәтлек

**ВЕРОТЕРПИ́МОСТЬ** *ж* дингә тигеҙ ҡараш, дин иреген таныу

**ВЕРОУЧЕ́НИЕ** *с* дин ғилеме, дин ҡағиҙәләре

**ВЕРОЯ́ТНО** *вводн. сл.* ихтимал, моғайын, ахыры; **вероя́тно, сего́дня не бу́дет дождя́** бөгөн ямғыр булмаҫ, ахыры

**ВЕРОЯ́ТНОСТЬ** *ж* ихтималлыҡ, мөмкинлек ♦ **по всей вероя́тности** моғайын, ихтимал, булһа кәрәк; **тео́рия вероя́тности** *мат.* ихтималлыҡ теорияһы (*математикала осраҡлы күренештәрҙе өйрәнеү бүлеге*)

**ВЕРОЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое мөмкин, мөмкин булған, мөмкин һаналған

**ВЕ́РСИЯ** *ж* версия, юрау (*берәй ваҡиға йәки факт тураһында төрлөсә юрауҙарҙың береһе*); **но́вая ве́рсия** яңы версия, яңы юрау; **после́дняя ве́рсия** һуңғы версия

**ВЕРСТА́** *ж* **1.** саҡрым (*1,06 км-ға тигеҙ*) **2.** *уст.* (*столб*) саҡрым бағанаһы **3.** *перен., разг.* (*о человеке высокого роста*) саҡрым бағанаһы ♦ **за версту́** саҡрымдан, әллә ҡайҙан, алыҫтан; **коло́менская верста́; с коло́менскую версту́** *ирон.* саҡрым бағанаһы (*бик оҙон, һонтор кеше тураһында*)

**ВЕРСТА́К** *м*; *тех.* верстак (*столяр станогы*)

**ВЕРСТА́ЛЬЩИК** *м*; *полигр.* вёрсткалаусы

**ВЕРСТА́ТЬ** *несов. что*; *полигр.* вёрсткалау, вёрсткаға һалыу; **верста́ть кни́гу** китап вёрсткалау

**ВЕРСТА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **верста́ть**

**ВЁРСТКА** *ж* **1.** *см.* **верста́ть**; **вёрстка кни́ги** китапты вёрсткалау **2.** вёрстка (*биткә һалынған набор, шуның баҫмаһы*); **чита́ть вёрстку** вёрстка уҡыу

**ВЕРСТОВО́Й,** -ая, -ое саҡрым ...ы; **верстово́й столб** саҡрым бағанаһы

**ВЕ́РТЕЛ** *м* шеш (*ит киҫәктәрен ҡыҙҙырыу өсөн*); **жа́рить мя́со на ве́ртеле** шештә ит ҡыҙҙырыу

**ВЕРТЕ́П** *м* боҙоҡлоҡ ояһы (*фәхеш, эскелек, енәйәттәр урыны*)

**ВЕРТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* әйләндереү, өйрөлтөү, өйрөлдөрөү; **верте́ть веретено́** орсоҡ өйрөлтөү; **верте́ть колесо́** тәгәрмәс әйләндереү **2.** *что* төрөү; **верте́ть папиро́ску** тәмәке төрөү **3.** *кем-чем*; *перен., разг.* бейетеү, бейетеп тотоу (тороу); **он верте́л людьми́ как хоте́л** ул кешеләрҙе нисек теләһә, шулай бейетте ♦ **верте́ть хвосто́м** ҡойроҡ болғау, хәйләләшеү; **как ни верти́** нисек кенә тиһәң дә, ни генә әйтһәң дә, ҡайһылай ғына эшләһәң дә

**ВЕРТЕ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** әйләнеү, өйрөлөү, әйләнеп өйрөлөп тороу; **колесо́ ве́ртится** тәгәрмәс әйләнә **2.** *разг.* борғоланыу, өйрөлөү, бөтөрөлөү, әйләнеп-тулғаныу; **верте́ться перед зе́ркалом** көҙгө алдында бөтөрөлөү **3.** сыуалыу, буталыу; **ребёнок ве́ртится о́коло ма́мы** бала әсәһе эргәһендә сыуала **4.** *разг.* борғоланыу, ҡойроҡ болғау, хәйләләү; **говори́ пра́вду, не верти́сь** дөрөҫөн һөйлә, борғоланма ♦ **верте́ться волчко́м** бөтөрөлөү, бөтөрөлөп эшләү; **верте́ться на языке́** тел осонда ғына тора; **верте́ться как бе́лка в колесе́** йүгереп йөрөп эшләү, барыһына ла өлгөрөргә тырышыу; **верте́ться под нога́ми (на глаза́х, перед глаза́ми)** аяҡ аҫтында сыуалыу, ҡамасаулау; **как ни верти́сь** нисек кенә тырышма, нимә генә эшләһәң дә

**ВЕРТИКА́ЛЬ** *ж* вертикаль, вертикаль һыҙыҡ, аҫма һыҙыҡ

**ВЕРТИКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое вертикаль ...ы, аҫма; **вертика́льная ли́ния** аҫма һыҙыҡ

**ВЕРТИХВО́СТКА** *ж*; *прост.* елбәҙәк ҡатын-ҡыҙ, еңел холоҡло ҡатын-ҡыҙ

**ВЁРТКИЙ,** -ая, -ое *разг.* йылғыр, сос, сапсан; **вёрткий ма́льчик** йылғыр малай

**ВЕРТЛЮ́Г** *м* **1.** *анат.* суҡмар һөйәк **2.** *тех.* вертлюг (*механизмдарҙа күсәрҙең оя эсендә әйләнә торған осо*)

**ВЕРТЛЮ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** суҡмар һөйәге ...ы **2.** вертлюг ...ы; **вертлю́жное соедине́ние** вертлюглы тоташыу

**ВЕРТЛЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое тик тормаҫ, тынғыһыҙ, ырғандаҡ, тыртандаҡ; **вертля́вый ма́льчик** тик тормаҫ малай; **вертля́вая де́вочка** тыртандаҡ ҡыҙыҡай

**ВЕРТОЛЁТ** *м* вертолёт; **вое́нный вертолёт** хәрби вертолёт

**ВЕРТОЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое вертолёт ...ы; **вертолётный заво́д** вертолёт заводы; **вертолётный дви́гатель** вертолёт двигателе

**ВЕРТОЛЁТЧИК** *м* вертолётсы

**ВЕРТОПРА́Х** *м*; *разг.* елғыуар, елбәҙәк (*кеше*)

**ВЕРТУ́Н** *м* **1.** *разг.* тик тормаҫ, сусанлаҡ ир-ат **2.** (*голубь*) әйләнсек күгәрсен

**ВЕРТУ́ШКА** *ж*; *разг.* **1.** өйрөлмә, вертушка **2.** (*легкомысленная женщина*) шиҡанлаҡ, елбәҙәк ҡатын-ҡыҙ

**ВЕ́РУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **ве́ровать** **2.** *в знач. сущ.* **ве́рующий** *м* и **ве́рующая** *ж* дингә ышаныусы, дини, диндар

**ВЕРФЬ** *ж*; *мор.* верфь (*суднолар эшләү һәм ремонтлау урыны*)

**ВЕРХ** *м* **1.** (*верхняя часть, оконечность*) өҫ, үр, түбә, сусаҡ, баш; **на са́мом верху́** иң өҫтә; **верх горы́** тау түбәһе; **верхи́ дере́вьев** ағас баштары **2.** (*верхний этаж*) өҫкө ҡат, юғары ҡат; **верх до́ма** өйҙөң юғары ҡаты **3.** (*лицевая сторона*) тыш, уң яҡ; **шу́ба с суко́нным ве́рхом** буҫтау тышлы тун **4.** (*крыша экипажа, машины*) япма;

**верх грузовика́** йөк машинаһының япмаһы **5.** *разг.* (*верхнее течение реки*) баш, үр; **плыть с ве́рху** үрҙән ағып төшөү **6.** *мн.* **верхи́**; *разг.* (*высшие круги общества*) идара итеүселәр даирәһе, юғары ҡатлам, юғары даирә; **прави́тельственные верхи́** хөкүмәт менән идара итеүсе юғары ҡатлам **7.** (*высшая степень*) (иң) юғары баҫҡыс; **верх мастерства́** оҫталыҡтың юғары баҫҡысы **8.** *мн.* **верхи́**; *муз.* (*высокие звуки*) юғары тауыштар **9.** *мн.* **верхи́** өҫтән, һай; **скользи́ть по верха́м** һай йөҙөү; **усво́ить лишь верхи́** өҫтән генә үҙләштереү; **нахвата́ться верхо́в** өҫтән генә белем алыу, һай йөҙөү ♦ **брать (взять) верх** өҫтөнлөк алыу; **одержа́ть верх** еңеү, өҫтөнлөк алыу; **быть на верху́ блаже́нства** рәхәтлектең сигенә сығыу

**ВЕ́РХНИЙ,** -яя, -ее **1.** өҫкө, юғары; **ве́рхний эта́ж** өҫкө ҡат; **ве́рхняя по́лка** юғары кәштә **2.** (*близкий к истоку реки*) үрге; **ве́рхнее тече́ние реки́** йылғаның үрге ағымы **3.** (*об одежде*) тышҡы, өҫкө; **ве́рхняя оде́жда** өҫкө кейем **4.** *муз.* юғары; **ве́рхний реги́стр** юғары регистр ♦ **ве́рхнее чутьё** *охот.* еҫ һиҙеү (*эттең эҙ буйынса түгел, еҫ буйынса һиҙемләүе*); **ве́рхняя пала́та** *полит.* юғары палата

**ВЕРХОВЕ́НСТВО** *с*; *книжн.* өҫтөнлөк, хакимлыҡ; **верхове́нство ме́стных зако́нов** урындағы ҡанундарҙың өҫтөнлөгө

**ВЕРХО́ВНЫЙ,** -ая, -ое юғары, баш; **Верхо́вный Сове́т БАССР** БАССР Юғары Советы; **Верхо́вный главнокома́ндующий** Баш главнокомандующий; **верхо́вная власть** юғары власть

**ВЕРХОВО́ДИТЬ** *несов. кем-чем*; *разг.* баш булыу, етәкселек итеү, башлап алып барыу; **верхово́дить ребя́тами** малайҙарға баш булып йөрөү

**ВЕРХОВО́Й I,** -ая, -ое **1.** һыбай, менге; **верхова́я езда́** һыбай йөрөү; **верхова́я ло́шадь** менге ат **2.** *в знач. сущ.* **верхово́й** *м* (*всадник*) һыбайлы; **верховы́е ска́чут** һыбайлылар саба

**ВЕРХОВО́Й II,** -ая, -ое **1.** юғары, юғарғы, өҫкө, үрге, һыбайлы; **верхово́й ве́тер** юғарғы ел; **верхово́й бура́н** һыбайлы буран; **верховы́е пласты́** өҫкө ҡатлам **2.** (*расположенный выше по течению*) үрге, үрҙәге, юғарылағы; **верховы́е сёла** үрге ауылдар; **верховы́е ме́льницы** үрҙәге тирмәндәр **3.** *разг.* верховой, бейектә эшләүсе (*вышкала*)

**ВЕРХО́ВЬЕ** *с* (*верхняя часть реки*) үрге ағым, үр, баш; **верхо́вья Бе́лой** Ағиҙел үре

**ВЕРХОГЛЯ́Д** *м*; *разг.* өҫтән ҡараусы, еңел ҡараусы (*эшкә, мәсьәләгә*)

**ВЕРХОГЛЯ́ДСТВО** *с*; *разг.* өҫтән (еңел) ҡарау

**ВЕРХОЛА́З** *м* верхолаз, бейектә эшләүсе

**ВЕ́РХОМ** *нареч.* **1.** (*по нагорной части местности*) өҫ яҡлап, өҫкө яғы буйлап, һыртлап; **идти́ ве́рхом** өҫ яҡлап барыу **2.** (*выше краёв*) өймәләмә, мөлдөрәмә, аштырғансы; **насы́пать муку́ в ведро́ ве́рхом** ондо биҙрәгә өймәләмә итеп һалыу; **нали́ть стака́н ве́рхом** стаканды аштырғансы ҡойоу

**ВЕРХО́М** *нареч.* **1.** һыбай, ат менеп; **е́хать верхо́м** һыбай барыу **2.** (*сидя на чём-л., как на лошади*) атланып (ултырыу); **сиде́ть верхо́м на табуре́тке** ултырғыста атланып ултырыу ♦ **е́здить верхо́м** *на ком см.* **е́здить**

**ВЕРХУ́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өҫкө өлөшөндәге, юғарғы өлөшөндәге; **верху́шечные по́чки берёзы** ҡайындың өҫкө өлөшөндәге бөрөләр **2.** *перен.*, *разг.* юғары ҡатлам; **верху́шечные слои́ о́бщества** йәмғиәттең юғары ҡатламдары

**ВЕРХУ́ШКА** *ж* **1.** баш, өҫ яҡ, түбә, өҫкө (юғары) өлөш; **верху́шка де́рева** ағас башы; **верху́шка горы́** тау түбәһе; **верху́шки лёгких** үпкәнең өҫкө өлөшө **2.** *перен.*, *разг.* юғары ҡатлам; **пра́вящая верху́шка страны́** илдең идара итеүсе юғары ҡатламы

**ВЕ́РША** *ж* мурҙа, һеүән

**ВЕРШИ́НА** *ж* **1.** түбә, баш, сусаҡ, соңҡа; **верши́на горы́** тау түбәһе, тау соңҡаһы; **верши́ны тополе́й** тирәк баштары; **верши́на угла́** *мат.* мөйөш түбәһе **2.** *перен.* юғары дәрәжә, баҫҡыс, юғары нөктә; **верши́на сла́вы** дандың юғары баҫҡысы; **на верши́нах сча́стья** бәхеттең иң юғары нөктәһендә

**ВЕРШИ́ТЕЛЬ** *м*; *книжн.* хәл итеүсе, хәл ҡылыусы; **верши́тель су́деб** яҙмыштарҙы хәл итеүсе

**ВЕРШИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*, *чем* хәл итеү, хәл ҡылыу, ослау, етәкселек итеү; **верши́ть все́ми дела́ми** бөтә эштәр менән етәкселек итеү; **верши́ть су́дьбами люде́й** кешеләрҙең яҙмышын хәл итеү **2.** *что*; *высок.* (*совершать*) тамамлау, ослау, бөтөрөү; **верши́ть дела́** эштәрҙе тамамлау **3.** *что*; *обл.* ослау, сығарыу; **верши́ть копну́** күбә ослау

**ВЕРШИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** эшләнеү; **верша́тся кру́пные дела́** ҙур эштәр эшләнә **2.** *страд. от* **верши́ть**

**ВЕРШКИ́** *мн.* өҫкө өлөш, һабаҡ, япраҡ; **мне вершки́, а тебе́ корешки́** *фольк.* миңә һабағы, һиңә тамыр(ҙар)ы

**ВЕРШКО́ВЫЙ,** -ая, -ое бер ҡарыш, бер ҡарыш оҙонлоғондағы; **вершко́вые гво́зди** бер ҡарыш оҙонлоғондағы ҡаҙаҡтар (сөйҙәр)

**ВЕРШО́К** *м* ҡарыш (*элекке оҙонлоҡ үлсәүе: баш бармаҡ менән урта бармаҡты яҙып торғандағы ара, аршындың дүрттән бер өлөшө*)

**ВЕС I** *м* **1.** ауырлыҡ; **определи́ть вес** ауырлығын билдәләү; **приба́вить в ве́се** ауырлығын арттырыу; **ве́сом в пять килогра́ммов** биш килограмм ауырлығында **2.** *перен.* (*влиятельность*) авторитет, абруй, дәрәжә; **име́ющий вес в о́бществе** йәмғиәттә абруйы булған ♦ **на вес зо́лота** алтын бәрәбәренә, алтын хаҡына (*бик ҡиммәтле, бик ҡәҙерле*); **живо́й вес** тереләй ауырлыҡ; **уде́льный вес** тотҡан урыны; **чи́стый вес** саф ауырлыҡ; **вес бру́тто** брутто ауырлығы (һауыты,

төргәге менән бергә тауар, аҙыҡ ауырлығы); **вес не́тто** нетто ауырлығы, үҙ ауырлығы

**ВЕС II: на весу́** аҫылындырып, һалындырып тотоу

**ВЕСЕЛЕ́ТЬ** *несов.* күңел күтәрелеү, кәйефләнеү

**ВЕСЕЛИ́ТЬ** *несов. кого* күңелен күтәреү, күңелен асыу, кәйефләндереү, ҡыуандырыу, шатландырыу; **весели́ть ребёнка** баланы ҡыуандырыу, баланың күңелен асыу; **весели́ть пу́блику** халыҡтың күңелен күтәреү, күңелен асыу

**ВЕСЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.* күңел асыу, кәйеф-сафа ҡороу, күңелләнеү

**ВЕ́СЕЛО 1.** *нареч.* күңелле, күңелле итеп, шат, шатланып; **она́ ве́село засмея́лась** ул күңелле итеп көлөп ебәрҙе **2.** *в знач. сказ., безл.* күңелле; **мне о́чень ве́село** миңә бик күңелле

**ВЕСЁЛОСТЬ** *ж* күңеллелек, күңел күтәренкелеге, шат күңеллелек, шат күңелле булыу, шат булыу

**ВЕСЁЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** күңелле, шат күңелле, күтәренке; **весёлое настрое́ние** күтәренке кәйеф; **весёлый спекта́кль** күңелле спектакль; **он всегда́ весёлый** ул һәр ваҡыт шат күңелле **2.** көләс, шат; **весёлое лицо́** көләс йөҙ; **весёлая улы́бка** шат йылмайыу **3.** йәмле, матур, яҡты, хозур; **весёлая ко́мната** йәмле бүлмә; **весёлая расцве́тка тка́ни** матур биҙәкле тауар; **весёлый вид** хозур күренеш

**ВЕСЕ́ЛЬЕ** *с* **1.** (*радостное настроение*) күңеллелек, шат күңеллелек, кәйеф күтәренкелеге **2.** (*развлечение*) уйын-көлкө, кәйеф-сафа, күңел асыу

**ВЕСЕ́ЛЬНЫЙ** и *разг.* **ВЁСЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ишкәк ...ы; **весе́льная ру́чка** ишкәк тотҡаһы **2.** ишкәкле; **весе́льная ло́дка** ишкәкле кәмә

**ВЕСЕЛЬЧА́К** *м*; *разг.* мәҙәксе, шаян, күңелсәк, уйын-көлкөсөл кеше

**ВЕСЕ́ННИЙ,** -яя, -ее яҙғы, яҙ ...ы; **весе́нний во́здух** яҙғы һауа; **весе́нний день** яҙғы көн; **весе́нний сев** яҙғы сәсеү; **весе́нние кани́кулы** яҙғы каникул

**ВЕ́СИТЬ** *несов.* тартыу; **ры́ба ве́сит два килогра́мма** балыҡ ике килограмм тарта **2.** *перен.* әһәмиәткә эйә булыу; **ва́ши слова́ ничего́ не ве́сят** һеҙҙең һүҙҙәрегеҙ бер ниндәй ҙә әһәмиәткә эйә түгел

**ВЕ́СКИЙ,** -ая, -ое **1.** тос, һалмаҡ, берәгәйле; **свине́ц — ве́ский мета́лл** ҡурғаш — тос металл **2.** (*убедительный, значительный*) төплө, нигеҙле, ышандырырлыҡ; **ве́ский до́вод** төплө дәлил; **ве́ское замеча́ние** нигеҙле иҫкәрмә

**ВЕСЛО́** *с* ишкәк; **грести́ весло́м** ишкәк менән ишеү

**ВЕСНА́** *ж* **1.** яҙ; **ра́нняя весна́** иртә яҙ; **наступа́ет весна́** яҙ килә **2.** *перен.* (*о молодости*) яҙ

**ВЕСНОВСПА́ШКА** *ж*; *с.-х.* яҙғы һөрөү (*туңға һөрөлмәгән ерҙе*)

**ВЕСНО́Й** и **ВЕСНО́Ю** *нареч.* яҙын, яҙғыһын, яҙ көнөндә; **ра́нней весно́й** иртә яҙын

**ВЕСНУ́ШКИ** *мн.* (*ед.* **весну́шка** *ж*) һипкел; **весе́нние весну́шки** яҙғы һипкел

**ВЕСНУ́ШЧАТЫЙ,** -ая, -ое һипкелле; **весну́шчатое лицо́** һипкелле бит

**ВЕСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*служащий для определения веса*) үлсәү ...ы; **весова́я ги́ря** үлсәү гере; **весова́я катего́рия** *спорт.* ауырлыҡ категорияһы **2.** (*продаваемый на вес*) үлсәүле, үлсәмле, үлсәп һатыла торған; **весово́й това́р** үлсәүле тауар; **весово́й хлеб** үлсәп һатыла торған икмәк

**ВЕСОВЩИ́К** *м* и **ВЕСОВЩИ́ЦА** *ж* үлсәүсе

**ВЕСО́МОСТЬ** *ж* ауырлыҡ, ауырлығы булыу

**ВЕСО́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*обладающий весом*) ауырлыҡлы, ауырлығы булған **2.** *перен.* (*ощутимый, значимый*) әһәмиәтле, һалмаҡ, көслө генә; **весо́мое сло́во** әһәмиәтле һүҙ; **весо́мые до́воды** көслө генә дәлилдәр

**ВЕСТ** *м* **1.** *мор.* көнбайыш **2.** *мор., метеор.* көнбайыш еле

**ВЕСТИ́** *несов.* **1.** *кого-что* алып барыу, килеү; **вести́ ма́льчика за́ руку** малайҙы етәкләп алып барыу **2.** (*управлять движущимся предметом*) алып барыу, йөрөтөү; **вести́ самолёт** самолёт йөрөтөү; **вести́ по́езд** поезды алып барыу **3.** *перен.* (*направлять деятельность кого-л., руководить кем-л.*) алып барыу, үткәреү, етәкселек итеү, идара итеү; **вести́ семина́р** семинар алып барыу; **вести́ практи́ческие заня́тия** практик дәрестәр үткәреү; **вести́ произво́дственный отде́л** производство бүлеге менән етәкселек итеү **4.** *чем, по чему* (*двигать, перемещать что-л. по какой-л. поверхности*) йөрөтөү, күрһәтеү; **вести́ ука́зкой по ка́рте** указканы карта буйлап йөрөтөү **5.** *что* (*прокладывать, протягивать, проводить*) үткәреү, һалыу, төҙөү, һуҙыу; **вести́ желе́зную доро́гу** тимер юл һалыу; **вести́ телефо́нную ли́нию** телефон линияһы үткәреү **6.** *перен.* алып барыу, килтереп сығарыу, килтереү; **ложь к добру́ не ведёт** ялған яҡшылыҡҡа алып бармай; **нео́пытность ведёт к ава́риям** тәжрибәһеҙлек аварияларға килтерә **7.** (*в сочетании с некоторыми существительными означает "составлять", "выполнять", "производить", "осуществлять"*) төҙөү, үтәү, алып барыу, тормошҡа ашырыу; **вести́ протоко́л** протокол алып барыу; **вести́ ого́нь** атышыу, атыу; **вести́ дру́жбу** дуҫ булыу **8.** (*в сочетании с существительными, обозначающими действие, образует описательное выражение со значением этого действия*) ...ыу, ...ыу итеү; **вести́ войну́** һуғышыу; **вести́ борьбу́** көрәшеү; **вести́ торго́влю** һатыу итеү ♦ **вести́ речь** *к чему* һөйләшеү алып барыу; **вести́ нача́ло** *от кого-чего* башланыу, башланып китеү; **вести́ свой род** *от кого* үҙендең ырыуыңды

дауам итеү; **вести́ себя́** *как* үҙеңде ... кеүек тотоу; **вести́ свою́ ли́нию** үҙ һүҙен һүҙ итеү; **и у́хом не вести́** уйлап та бирмәй, ҡолағына ла элмәй

**ВЕСТИБУЛЯ́РНЫЙ: вестибуля́рный аппара́т** *анат.* вестибуляр аппарат

**ВЕСТИБЮ́ЛЬ** *м* вестибюль; **вестибю́ль теа́тра** театр вестибюле

**ВЕСТИ́СЬ** *несов.* **1.** (*совершаться, происходить, производиться*) алып барылыу, башҡарылыу, үткәрелеү; **вели́сь разгово́ры** һөйләшеүҙәр алып барылды; **в э́том направле́нии веду́тся нау́чные иссле́дования** был йүнәлештә ғилми тикшеренеүҙәр алып барыла **2.** *безл.*; *разг.* ғәҙәткә кереү, ғәҙәт булып китеү, килеү; **испоко́н так ведётся** борондан шулай килә **3.** *страд. от* **вести́** 1, 2, 3, 5, 8

**ВЕ́СТНИК** *м* **1.** хәбәрсе, хәбәр биреүсе (итеүсе, килтереүсе) **2.** (*название изданий*) вестник; **"Ве́стник Акаде́мии нау́к РБ"** "БР фәндәр академияһы хәбәрҙәре"

**ВЕСТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** сигналсы, сигнал биреүсе, хәбәрсе, хәбәр итеүсе; **вестова́я пу́шка** сигнал биреүсе пушка; **вестово́е су́дно** сигнал биреүсе судно **2.** *в знач. сущ.* **вестово́й** *м*; *воен.* сабауыл, атсабар

**ВЕ́СТОЧКА** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **весть** 1

**ВЕСТЬ** *ж* **1.** хәбәр, белдереү; **ра́достная весть** шатлыҡлы хәбәр **2.** *мн.* **ве́сти**; *разг.* имеш-мимеш һүҙ, ғәйбәт ♦ **бе́з вести пропа́сть** хәбәрһеҙ юғалыу; **бог весть** алла белһен

**ВЕСЫ́** *мн.* **1.** үлсәү; **апте́карские весы́** аптека үлсәүе; **со́тенные весы́** йөҙәрле үлсәү; **ручны́е весы́** ҡул үлсәүе **2.** *астр.* Үлсәү (*йондоҙлоҡ*)

**ВЕСЬ I** *м* (вся *ж*, всё *с*) *мест.* **1.** (*целый, целиком*) бөтә, бөтөн, тотош, барлыҡ, барса, буйы (менән); **всё ле́то** йәй буйы; **весь день** көн буйы; **во всём ми́ре** бөтөн донъяла; **все лю́ди** барлыҡ кешеләр; **весь кра́сный** тотош ҡыҙыл **2.** бөтөнләй, тулыһынса, тотош; **бума́га вся** ҡағыҙ тулыһынса бөттө; **са́хар весь** шәкәр бөтөнләй бөттө **3.** *в знач. сущ.* **всё** *с* и **все** *мн.* бөтә, бөтәһе, бөтөнөһө, барыһы; **всё его́ ра́довало** уны бөтә нәмә лә шатландыра ине; **все напряжённо смотре́ли вперёд** бөтөнөһө лә көсөргәнеп алға текләне ♦ **весь в** *кого* тас; **весь в отца́** атас, тас атаһы; **все до одного́** береһе лә ҡалмай, бөтөнөһө лә, барыһы ла; **всего́ хоро́шего** һау бул(ығыҙ); **всё одно́, всё еди́но** барыбер, бөтәһе лә бер; **без всего́** бер нәмәһеҙ; **во всю ива́новскую** *см.* **ива́новский**; **по всему́** күренеүенсә; **при всём том**; **со всем тем** шуға ҡарамаҫтан; **вот и всё** бөттө (*башҡа өҫтәрлек нәмә юҡ*); **не все до́ма** *у кого* еңел аҡыллы; **пре́жде всего́** беренсе урында, иң мөһиме, беренсе сиратта

**ВЕСЬ II** *ж*; *уст.* ауыл; **города́ и ве́си** ҡалалар һәм ауылдар

**ВЕСЬМА́** *нареч.* бик, иң, ғәйәт, үтә; **весьма́ рад** бик шат; **лю́ди здесь весьма́ примеча́тельные** кешеләр бында ғәйәт яҡшылар

**ВЕТВИ́СТОСТЬ** *ж* ботаҡлылыҡ

**ВЕТВИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ботаҡлы, тармаҡлы; **ветви́стые берёзы** ботаҡлы ҡайындар

**ВЕТВИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*пускать отростки*) ботаҡланыу, ботаҡ ебәреү **2.** (*разветвляться*) тармаҡланыу, тармаҡтарға айырылыу

**ВЕТВЬ** *ж* **1.** ботаҡ; **ве́тви я́блонь** алмағас ботаҡтары **2.** (*ответвление*) тармаҡ **3.** (*линия родства*) нәҫел тармағы

**ВЕ́ТЕР** *м* ел; **си́льный ве́тер** көслө ел; **сла́бый ве́тер** әкрен ел; **ве́тер подня́лся** ел күтәрелде; **ве́тер улёгся** ел туҡтаны ♦ **ве́тер в голове́** *у кого* башында ел уйнай (*донъяға еңел ҡарашлы кеше хаҡында*); **како́й ве́тер занёс**; **каки́м ве́тром занесло́** ниндәй ел алып килде, ниндәй ел ташланы (*берәүҙең уйламаған ерҙән килеп инеүенә ҡарата*); **броса́ть (кида́ть, швыря́ть) де́ньги на ве́тер** аҡсаны елгә осороу (һыуға һалыу); **броса́ть слова́ на ве́тер** уйламайынса һөйләү; **держа́ть нос по ве́тру** теге йәки был хәлгә яраҡлашырға тырышыу; **куда́ ве́тер ду́ет (идти́, смотре́ть и т.д.)** ел ҡайһы яҡҡа иҫһә, шул яҡҡа (йөрөү, барыу, ҡарау) (*аумаҡай кеше тураһында*); **ищи́ ве́тра в по́ле** ҡойроғон да тота алмаҫһың, елдәр иҫкән

**ВЕТЕРА́Н** *м* **1.** ветеран, ҡарт һуғышсы; **ветера́н Гражда́нской войны́** Граждандар һуғышы ветераны **2.** *чего* ветеран (*бер эштә оҙаҡ йылдар эшләгән, тәжрибәле кеше*); **ветера́н труда́** хеҙмәт ветераны

**ВЕТЕРИНА́Р** *м* ветеринар, мал врачы, ветеринария белгесе

**ВЕТЕРИНА́РИЯ** *ж* ветеринария (*хайуандарҙың ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау юлдарын өйрәнә торған фән*)

**ВЕТЕРИНА́РНЫЙ,** -ая, -ое ветеринария ...ы; **ветерина́рный пункт** ветеринария пункты

**ВЕТЕРО́К** *м*; *уменьш. от* **ве́тер** аҡрын ел, йомшаҡ ел ♦ **с ветерко́м прокати́ться** елдереп, бик шәп барыу

**ВЕ́ТКА** *ж* **1.** ботаҡ; **ве́тка берёзы** ҡайын ботағы **2.** *ж.-д.* тармаҡ; **железнодоро́жная ве́тка** тимер юл тармағы

**ВЕТЛА́** *ж* өйәңке, аҡ тал

**ВЕ́ТО** *с нескл.*; *юр.* вето, тыйыу, рөхсәт итмәү (**1.** *дәүләт хоҡуғында*: *бер хөкүмәт органының икенсе бер орган ҡарарына һалған тыйыуы* **2.** *халыҡ-ара хоҡуҡта*: *бер тауыштан хәл ителергә тейешле булған халыҡ-ара коллегиаль органдарҙың ҡарарҙарын ҡабул иткәндә риза булмауы бер тауыш*); **наложи́ть ве́то** вето һалыу; **пра́во ве́то** тыйыу хоҡуғы

**ВЕТО́ШНЫЙ,** -ая, -ое иҫке-моҫҡо, сепрәк-сапраҡ...ы; **вето́шный склад** сепрәк-сапраҡ склады

**ВЕ́ТОШЬ** *ж собир.* сепрәк-сапраҡ, иҫке-моҫ-ҡо сепрәк, алам-һалам

**ВЕ́ТРЕНИК** *м* и **ВЕ́ТРЕНИЦА** *ж*; *разг.* еңел аҡыллы кеше, елғыуар

**ВЕ́ТРЕНИЦА** *ж* елбәҙәк, елбәгәй (*үлән*)

**ВЕ́ТРЕНО 1.** *нареч.* еңел аҡыллы, елбәҙәк (булыу) **2.** *в знач. сказ., безл.* еләҫ; **сего́дня ве́трено** бөгөн еләҫ

**ВЕ́ТРЕНОСТЬ** *ж* еңел аҡыллылыҡ, елбәҙәклек, елғыуарлыҡ

**ВЕ́ТРЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** елле; **ве́треный день** елле көн **2.** *перен.* еңел аҡыллы, елбәҙәк, елғыуар; **ве́треный челове́к** елғыуар кеше

**ВЕТРИ́ЛО** *с*; *уст., трад.-поэт.* елкән ♦ **без руля́ и без ветри́л** аныҡ йүнәлешһеҙ, маҡсатһыҙ

**ВЕТРО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ел" мәғәнәһенә тап килгән тәүге өлөшө, мәҫ.,* **ветроуказа́тель** ел күрһәткес

**ВЕТРО́ВКА** *ж*; *разг.* еңел куртка

**ВЕТРОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ел ...ы; **ветрово́й шквал** ел өйөрмәһе **2.** (*для защиты от ветра*) еллек ...ы; **ветрово́е стекло́** еллек быяла

**ВЕТРОГО́Н** *м* **1.** *прост.* еңел аҡыллы, елғыуар ир-ат **2.** *тех.* ел ҡыуҙырғыс

**ВЕТРОГО́НКА** *ж*, *прост.* елғыуар ҡатын-ҡыҙ

**ВЕТРОДВИ́ГАТЕЛЬ** *м* ел двигателе

**ВЕТРОЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое елдән һаҡлаусы, елдән һаҡлай торған; **ветрозащи́тная полоса́ ле́са** елдән һаҡлаусы урман һыҙаты

**ВЕТРОМЕ́Р** *м*; *метеор.* ел үлсәгес (*ел көсөн үлсәү приборы*)

**ВЕТРОСИЛОВО́Й,** -ая, -ое *тех.* ел көсө менән эшләүсе, ел көсө менән эшләгән; **ветросилова́я устано́вка** ел көсө менән эшләүсе ҡоролма

**ВЕТРЯ́К** *м*; *разг.* **1.** ел двигателе **2.** ел тирмәне

**ВЕТРЯ́НКА I** *ж*; *прост. см.* **ветря́к** 2

**ВЕТРЯ́НКА II** *ж*; *разг.* һыу сәсәге (*балалар ауырыуы*)

**ВЕТРЯНО́Й,** -ая, -ое ел ...ы; **ветряна́я ме́льница** ел тирмәне ♦ **воева́ть (сража́ться) с ветряны́ми ме́льницами** юҡ-бар менән булышыу; **ветряна́я (ве́тряная) оспа** *мед.* һыу сәсәге (*балалар ауырыуы*)

**ВЕТФЕ́ЛЬДШЕР** *м* (*ветеринарный фельдшер*) мал фельдшеры

**ВЕ́ТХИЙ,** -ая, -ое **1.** иҫке, иҫкергән, туҙған, туҙып бөткән; **ве́тхий дом** иҫке өй **2.** (*о человеке*) бик ҡарт, ҡартайып бөткән, туҙған; **ве́тхая стару́ха** ҡартайып бөткән әбей ♦ **Ве́тхий Заве́т** Тәүрат, Иҫке Ғәһет

**ВЕТХОЗАВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое боронғо, иҫке ҡарашлы; **ветхозаве́тные нра́вы** иҫке ҡарашлы ғөрөф-ғәҙәттәр

**ВЕ́ТХОСТЬ** *ж* **1.** иҫкереү, туҙыу; **прийти́ в ве́тхость** иҫкереп бөтөү **2.** (*дряхлость*) туҙғанлыҡ, ҡартайғанлыҡ, иҫкергән булыу

**ВЕТЧИНА́** *ж* ветчина (*тоҙлап ҡаҡланған сусҡа ите*)

**ВЕТША́ТЬ** *несов.* **1.** (*приходить в негодность*) иҫкереү, туҙыу **2.** (*становиться дряхлым*) ҡартайыу, ҡаҡшау

**ВЕ́ХА** *ж* **1.** маяҡ, билдә; **доро́га обозна́чена ве́хами** юл маяҡтар менән билдәләнгән; **ста́вить ве́хи** билдә сәнсеү, маяҡ ҡаҙау **2.** *обычно мн.* **ве́хи** төп (мөһим) этап (момент); **основны́е ве́хи исто́рии** тарихтың төп этаптары

**ВЕ́ЧЕ** *с*; *ист.* вече (*Рустың ҡайһы бер ҡалаларында иң юғары орган булған халыҡ йыйылышы*)

**ВЕЧЕВО́Й,** -ая, -ое *ист.* вече ...ы; **вечева́я пло́щадь** вече майҙаны; **вечево́й ко́локол** вече ҡыңғырауы

**ВЕ́ЧЕР** *м* **1.** кис; **собра́ться к ве́черу** кискә ҡаршы йыйылыу; **наступи́л ве́чер** кис булды **2.** кисә; **музыка́льный ве́чер** музыка кисәһе; **устро́ить литерату́рный ве́чер** әҙәби кисә ойоштороу

**ВЕЧЕРЕ́ТЬ** *несов. безл.* кисләү, кис булыу

**ВЕ́ЧНО** *нареч.* **1.** (*бесконечно, всегда*) мәңге, һәр ваҡыт; **мате́рия существу́ет ве́чно** материя мәңге йәшәй **2.** *разг.* (*постоянно*) һәр ваҡыт, гел, мәңге; **он ве́чно за́нят** ул мәңге бушамай; **быть ве́чно недово́льным** гел ризаһыҙ булыу, мәңге ҡәнәғәт булмау

**ВЕЧНОЗЕЛЁНЫЙ,** -ая, -ое мәңге йәшел; **вечнозелёные расте́ния** мәңге йәшел үҫемлектәр

**ВЕ́ЧНОСТЬ** *ж* мәңгелек, бик оҙаҡ ваҡыт, бик оҙаҡ; **не ви́деть це́лую ве́чность** бик оҙаҡ ваҡыт күрмәү ♦ **ка́нуть в ве́чность** онотолоу, эҙһеҙ юғалыу; **отойти́ в ве́чность** үлеү

**ВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәңгелек; **ве́чная мате́рия** *филос.* мәңгелек материя **2.** (*неизменный*) үҙгәрмәй торған, үҙгәрешһеҙ; **ве́чная и́стина** *филос.* үҙгәрмәй торған хәҡиҡәт **3.** (*не перестающий существовать*) мәңге, мәңгелек, ғүмерлек; **ве́чная мерзлота́** мәңгелек туңлыҡ; **ве́чная сла́ва** мәңгелек дан; **ве́чная любо́вь** мәңгелек мөхәббәт **4.** (*бессрочный*) мәңге; **переда́ча земли́ в ве́чное по́льзование** ерҙе мәңгелеккә биреү **5.** *разг.* (*постоянный, непрестанный*) өҙләкһеҙ, туҡтауһыҙ, һәр ваҡыттағы; **ве́чные спо́ры** өҙләкһеҙ бәхәс; **ве́чная трево́га** туҡтауһыҙ шом ♦ **ве́чное перо́** *уст.* авторучка; **ве́чный поко́й** үлем; **засну́ть ве́чным сном** үлеү; **на ве́ки ве́чные** *см.* **век**

**ВЕ́ШАЛКА** *ж* **1.** кейем элгес; **пове́сить пальто́ на ве́шалку** пальтоны кейем элгескә элеү **2.** *разг.* (*помещение*) гардероб, кейем сисеү урыны **3.** (*петля на одежде*) елкәлек, элмәк; **пришить ве́шалку** элмәк тегеү

**ВЕ́ШАТЬ I** *несов.* **1.** *что* элеү, элеп ҡуйыу, аҫыу; **ве́шать занаве́ски** ҡормалар элеү; **ве́шать ла́мпу** лампа аҫыу; **ве́шать карти́ну на сте́ну** кар-

тинаны стенаға элеп ҡуйыу **2.** *кого* (*казнить*) аҫыу, аҫып үлтереү ♦ **ве́шать го́лову** башты түбән эйеү, төшөнкөлөккә (өмөтһеҙлөккә) бирелеү; **ве́шать нос** танау төшөү; **ве́шать соба́к** *на кого* бәлә тағыу; **хоть топо́р ве́шай** тын алғыһыҙ, тынсыу, ҡара төтөн

**ВЕ́ШАТЬ II** *несов. кого-что* (*взвешивать*) үлсәү

**ВЕ́ШАТЬСЯ I** *несов.* **1.** аҫылыныу **2.** *страд. от* **ве́шать** I ♦ **ве́шаться на ше́ю** муйынға аҫылыныу

**ВЕ́ШАТЬСЯ II** *несов.* **1.** (*взвешиваться*) үлсәнеү **2.** *страд. от* **ве́шать** II

**ВЕШИ́ТЬ** *несов. что*; *геод.* билдә ҡуйыу; **веши́ть доро́гу** юлға билдә ҡуйыу

**ВЕ́ШКА** *ж*; *уменьш. от* **ве́ха**

**ВЕ́ШНИЙ,** -яя, -ее *уст.* яҙғы; **ве́шние во́ды** яҙғы һыуҙар; **ве́шние лучи́** яҙғы нурҙар

**ВЕЩА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **веща́ть**; **дар веща́ния** һөйләү оҫталығы **2.** радиотапшырыу, радионан һөйләү

**ВЕЩА́ТЬ** *несов.* **1.** *уст., высок.* һөйләү, хәбәр итеү **2.** (*предсказывать*) алдан белдереү, күрәҙәлек итеү **3.** (*передавать для слушания — о радио, телевидении*) тапшырыу, хәбәр тапшырыу

**ВЕЩЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** әйберләтә, әйбер менән; **вещево́е дово́льствие** әйберләтә тәьмин итеү; **вещево́е снабже́ние** әйбер менән тәьмин итеү **2.** әйбер ...ы, нәмә ...ы; **вещево́й склад** әйбер склады; **вещево́й мешо́к** әйбер тоҡо

**ВЕЩЕ́СТВЕННОСТЬ** *ж* матдилыҡ; **веще́ственность ми́ра** донъяның матдилығы

**ВЕЩЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *филос.* (*материальный*) матди; **веще́ственный мир** матди донъя **2.** (*состоящий из вещей*) әйберләтә ...ы, әйберҙәр нигеҙендә, әйберҙәр ...ы; **веще́ственный уро́н** әйберләтә зыян ♦ **веще́ственные доказа́тельства** *юр.* әйберләтә (матди) дәлил

**ВЕЩЕСТВО́** *с* матдә; **органи́ческое вещество́** органик матдә; **хими́ческое вещество́** химик матдә; **горю́чее вещество́** яныусы матдә; **отравля́ющее вещество́** ағыулаусы матдә

**ВЕ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *уст.* (*проницательный*) зирәк аҡыллы, үтә күреүсе, алдан күрә белеүсе **2.** күрәҙәлек ителгән, киләсәкте әйтеүсе, алдан әйтелгән, юралған; **ве́щие слова́** киләсәкте әйтеүсе һүҙҙәр (юрау)

**ВЕЩИ́ЦА** *ж* **1.** *уменьш. от* **вещь** 1; **2.** (*небольшое музыкальное или литературное произведение*) әҫәр

**ВЕ́ЩНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* әйберләтә ♦ **ве́щное пра́во** *юр.* әйбергә булған хоҡуҡ (*әйберҙәргә эйә булыу нормаларын билдәләгән граждандлыҡ хоҡуғы*)

**ВЕЩУ́Н** *м* и **ВЕЩУ́НЬЯ** *ж*; *уст.* (*прорицатель и прорицательница*) күрәҙәсе, киләсәкте алдан әйтеүсе, юраусы

**ВЕЩЬ** *ж* **1.** әйбер, нәмә **2.** *мн.* **ве́щи** (*об одежде и т.д.*) кейемдәр, кейем-һалым **3.** *мн.* **ве́щи** (*имущество*) әйберҙәр, мөлкәт **4.** (*произведение литературы, искусства, науки*) әҫәр; **написа́ть хоро́шую вещь** яҡшы әҫәр яҙыу **5.** (*явление действительности, факт*) күренеш, хәл, ваҡиға, хәл-ваҡиға; **вника́ть в причи́ну веще́й** хәл-ваҡиғаларҙың сәбәптәренә төшөнөү **6.** (*нечто, что-то*) нәмә, ниҙер; **стра́нная вещь се́рдце челове́ческое** кеше йөрәге ғәжәп нәмә **7.** *обычно мн.* **ве́щи**; *филос.* нәмә, зат; **есть ве́щи вне на́шего созна́ния** беҙҙең аңыбыҙҙан тыш нәмәләр бар ♦ **в поря́дке веще́й** ғәҙәттәге, тәбиғи; **называ́ть ве́щи свои́ми имена́ми** дөрөҫөн һөйләү, тураһын әйтеү

**ВЕ́ЯЛКА** *ж*; *с.-х.* елгәргес

**ВЕ́ЯЛЬЩИК** *м* и **ВЕ́ЯЛЬЩИЦА** *ж* елгәреүсе, елгәргестә эшләүсе

**ВЕ́ЯНИЕ** *с* **1.** иҫеү, өрөү (*ел*); **лёгкое ве́яние ве́тра** елдең йомшаҡ ҡына иҫеүе **2.** билге, билдә; **пе́рвые ве́яния о́сени** көҙҙөң беренсе билдәләре **3.** *перен.* (*направление, тенденция*) ағым, йүнәлеш; **но́вые ве́яния в иску́сстве** сәнғәттәге яңы йүнәлештәр

**ВЕ́ЯНЫЙ,** -ая, -ое елгәргән, елгәрелгән; **ве́яное зерно́** елгәрелгән ашлыҡ

**ВЕ́ЯТЬ** *несов.* **1.** (*дуть — о слабом ветре*) иҫеү, өрөү; **ве́тер ве́ет** ел иҫә **2.** *чем обычно безл.* бәреү, еҫе килеү, аңҡыу; **ве́ет прохла́дой** һалҡын бәрелә; **ве́ет весно́й** яҙ еҫе килә **3.** (*развеваться*) елберҙәү; **ве́ют знамёна** байраҡтар елберҙәй **4.** *что* и *без доп.* (*очищать зерно*) елгәреү; **ве́ять пшени́цу** бойҙай елгәреү

**ВЖАТЬ** *сов. что* ҡыҫыу, ҡыҫтырыу

**ВЖА́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҫылыу, һырыныу; **вжа́ться в спи́нку сиде́нья** ултырғыс арҡаһына һырыныу

**ВЖИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **вжи́ться**

**ВЖИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*свыкнуться*) эйәләшеү, күнегеү, үҙләшеү, инеп китеү; **актёр вжи́лся в свою́ роль** актер үҙенең роленә инеп китте

**ВЗ...** (**взо...**, **взъ...**, **вс...**) *приставка*

**1.** *хәрәкәттең юғарыға ҡарай йүнәлешен белдерә, мәҫ.,* **взлете́ть** юғарыға ҡарай осоу

**2.** *хәрәкәттең йә берәй хәлдең көсәйеүен, арта барыуын, мәҫ.,* **взбу́хнуть** бүртеп (ҡабарып) китеү; **взорва́ть** шартлатыу; **взвыть** (*о животных*) олоп ебәреү; (*о человеке*) үкереп илап ебәреү

**3.** *хәрәкәттең тамамланыуын, тулыланыуын, мәҫ.,* **взбеси́ть** асыуын ҡабартыу (үртәү); **взболта́ть** болғатыу, туғыу (туҡыу); **встать** туҡтау (туҡталыу)

**ВЗАД: взад и вперёд** артҡа-алға, үрле-түрле, тегеләй ҙә былай; **ни взад, ни вперёд** ни артҡа, ни алға (бармау); йә ары, йә бире (йөрөмәү); бер урында туҡтап ҡалыу

**ВЗАЙМНОСТЬ** *ж* уртаҡлыҡ, ҡара-ҡаршы (үҙ-ара) мөнәсәбәттәшлек, хөрмәт, дуҫлыҡ,

мөхәббәт; **отвеча́ть взаи́мностью** хөрмәт менән яуап биреү; **взаи́мность обяза́тельств** йөкләмәләрҙең уртаҡлығы

**ВЗАИ́МНЫЙ,** -ая, -ое үҙ-ара, бер-береңә, ҡара-ҡаршы, ике яҡтың да; **взаи́мное дове́рие** бер-береңә ышаныу; **взаи́мная по́мощь** үҙ-ара ярҙам; **взаи́мная любо́вь** үҙ-ара мөхәббәт; **взаи́мное согла́сие** ике яҡтың да ризалығы

**ВЗАИМО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "үҙ-ара", "икәү-ара" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **взаимовлия́ние** үҙ-ара йоғонто; **взаимоотноше́ние** үҙ-ара мөнәсәбәт

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВИЕ** *с* үҙ-ара йоғонто яһау, үҙ-ара килешеп эш итеү, бәйләнешле хәрәкәт; **взаимоде́йствие о́рганов** ағзаларҙың үҙ-ара тәьҫир итешеүе; **взаимоде́йствие обще́ственных явле́ний** йәмғиәт күренештәренең үҙ-ара йоғонто яһауы; **взаимоде́йствие всех родо́в войск** барлыҡ ғәскәр төрҙәренең бәйләнешле хәрәкәте

**ВЗАИМОДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* үҙ-ара йоғонто яһау, үҙ-ара тәьҫир итешеү, бәйләнешле хәрәкәт итеү

**ВЗАИМОЗАВИ́СИМОСТЬ** *ж* үҙ-ара бәйлелек, бер-береһенә бәйлелек; **взаимозави́симость ме́жду промы́шленностью и се́льским хозя́йством** сәнәғәт менән ауыл хужалығы араһында үҙ-ара бәйлелек

**ВЗАИМОИСКЛЮЧА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее ҡапма-ҡаршы, бер-береһен кире ҡағыусы; **взаимоисключа́ющие мне́ния** ҡапма-ҡаршы фекерҙәр

**ВЗАИМООБОГАЩЕ́НИЕ** *с* бер-береһен байытыу; **взаимообогаще́ние языко́в** телдәрҙең бер-береһен байытыуы

**ВЗАИМООБУСЛО́ВЛЕННОСТЬ** *ж* үҙ-ара бәйләнгәнлек (бәйләнеш), шартлы бәйлелек

**ВЗАИМООТНОШЕ́НИЕ** *с* **1.** (*взаимодействие*) үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәт; **экономи́ческое и полити́ческое взаимоотноше́ние госуда́рств** дәүләттәрҙең иҡтисади һәм сәйәси бәйләнеше **2.** *мн.* **взаимоотноше́ния** үҙ-ара мөнәсәбәт; **у меня́ с ним хоро́шие взаимоотноше́ния** унның менән мөнәсәбәтебеҙ яҡшы

**ВЗАИМОПО́МОЩЬ** *ж* үҙ-ара ярҙам, ярҙамлашыу, бер-береңә ярҙам ♦ **ка́сса взаимопо́мощи** үҙ-ара ярҙам кассаһы

**ВЗАИМОПОНИМА́НИЕ** *с* үҙ-ара аңлашыу, үҙ-ара килешеү, бер-береһен аңлау; **ме́жду на́ми по́лное взаимопонима́ние** бер-беребеҙҙе тулыһынса аңлайбыҙ

**ВЗАИМОСВЯ́ЗЬ** *ж* (үҙ-ара) бәйләнеш; **культу́рная взаимосвя́зь** мәҙәни бәйләнеш

**ВЗАЙМЫ́** *нареч.* үтескә, бурысҡа, көтәсәккә; **взять взаймы́** бурысҡа алыу; **дать взаймы́** үтескә биреү

**ВЗАМЕ́Н** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* алмашҡа; **предложи́ть взаме́н со́бственный план** алмашҡа үҙ планыңды тәҡдим итеү **2.** *предлог с род. п.* (*вместо*) урынына; **его́ назна́чили взаме́н ста́ршего инжене́ра** уны өлкән инженер урынына ҡуйҙылар

**ВЗАПЕРТИ́** *нареч.* **1.** бикле, йоҙаҡлы, бик аҫтында, йоҙаҡ аҫтында; **держа́ть взаперти́** *кого-л. кемделер* бик аҫтында тотоу **2.** *перен.* (*в уединении*) бикләнеп, яңғыҙ, аралашмай; **жить взаперти́** бикләнеп йәшәү

**ВЗАПРА́ВДАШНИЙ,** -яя, -ее *прост.* ысын; **биле́т был взапра́вдашний** билет ысын ине

**ВЗАПРА́ВДУ** *нареч.*; *прост.* ысын, ысынлап та, ысындан да; **он взапра́вду растеря́лся** ул ысынлап та юғалып ҡалды

**ВЗА́ПУСКИ** *нареч.*; *разг.* ҡыуышып, уҙышып, баҫтырышып, кем уҙарҙан; **бежа́ть вза́пуски** ҡыуышып йүгереү

**ВЗАСО́С: целова́ться взасо́с** һурып үбешеү

**ВЗАТЯ́ЖКУ: кури́ть взатя́жку** (төтөндө) эскә һурып тәмәке тартыу

**ВЗАХЛЁБ** *нареч.*; *прост.* йотлоғоп, ҡабаланып; **расска́зывать взахлёб** йотлоғоп һөйләү

**ВЗА́ШЕЙ** и **ВЗАШЕ́Й** *нареч.*; *прост.* елкәһенә биреп, этеләп-төрткөләп; **вза́шей прогна́ть** елкәһенә биреп ҡыуып сығарыу

**ВЗБА́ДРИВАТЬ** *несов. см.* **взбодри́ть**

**ВЗБА́ДРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **взба́дривать**

**ВЗБАЛАМУ́ТИТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *кого-что* (*взволновать*) юҡҡа тынысһыҙлау (борсоу), ҡуҙғытыу, бутау **2.** *что* (*взмутить*) буръяҡландырыу, болғатыу

**ВЗБАЛАМУ́ТИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* **1.** (*взволноваться*) юҡҡа тынысһыҙланыу, борсолоу **2.** (*взмутиться*) буръяҡланыу, болғаныу

**ВЗБА́ЛМОШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* килделе-киттеле, дыуамал, тинтәк

**ВЗБА́ЛТЫВАТЬ** *несов. см.* **взболта́ть**

**ВЗБА́ЛТЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **взба́лтывать**

**ВЗБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **взбежа́ть**

**ВЗБЕЖА́ТЬ** *сов.* йүгереп менеү, йүгереп менеп китеү; **взбежа́ть по ле́стнице** баҫҡыстан йүгереп менеп китеү

**ВЗБЕЛЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* бик ҡаты ярһытыу, шаштырыу, шашындырыу

**ВЗБЕЛЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* бик ҡаты ярһыу, шашыу, шашыныу, ҡотороноу

**ВЗБЕСИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡотортоу, үртәү, асыуын ҡабартыу (килтереү); **взбеси́ть свои́м равноду́шием** битарафлығы менән асыу ҡабартыу

**ВЗБЕСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡотороу **2.** (*прийти в бешенство*) ярһыу, ҡотороноу, шашыныу, тилереү, енләнеү

**ВЗБИВА́ТЬ** *несов. см.* **взбить**

**ВЗБИВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **взбива́ть**

**ВЗБИРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **взобра́ться**

**ВЗБИТЬ** *сов. что* **1.** (*напр., подушки, перину*) күпертеү, ҡабартыу **2.** (*вспенить жидкость*)

бешеү, туҡып күпертеү, туғып күбекләндереү; **взбить сли́вки** һөт өҫтөн туҡып күпертеү; **взбить яи́чные белки́** йомортҡа ағын туҡып күбекләндереү

**ВЗБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡабарыу, күпереү **2.** (*вспениться*) күбекләнеү, күпереү

**ВЗБЛЕСК** *м* ялтырау; **взблеск мо́лнии** йәшен ялтырауы

**ВЗБЛЕ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **взблесну́ть**

**ВЗБЛЕСНУ́ТЬ** *сов.* ялтырап китеү; **взблесну́ла мо́лния** йәшен ялтырап китте

**ВЗБОДРИ́ТЬ** *сов.*; *разг. кого-что* дәртләндереп ебәреү, күңелен күтәреп ебәреү; **взбодри́ть докла́дчика** докладсыны дәртләндереп ебәреү

**ВЗБОДРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* дәртләнеп китеү, күңел күтәрелеп китеү

**ВЗБОЛТА́ТЬ** *сов. что* болғатыу, туҡыу; **взболта́ть кефи́р** кефирҙы туҡыу

**ВЗБОЛТА́ТЬСЯ** *сов.* (*о жидкости*) болғаныу, туҡылыу

**ВЗБОРОЗДИ́ТЬ** *сов. что* бураҙналау, бураҙналап сығыу

**ВЗБОРОНИ́ТЬ** *сов. что* тырмалау, тырматыу, тырматып сығыу

**ВЗБОРОНОВА́ТЬ** *сов. см.* **взборони́ть**

**ВЗБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **взбро́сить**

**ВЗБРА́СЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **взбра́сывать**

**ВЗБРЕДА́ТЬ** *несов. см.* **взбрести́**

**ВЗБРЕСТИ́** *сов.*; *разг.* ҡыйынлыҡ менән менеү, тырышып-тырмашып менеү ♦ **взбрести́ в го́лову (на ум)** башҡа уй килеү

**ВЗБРО́СИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*бросить вверх*) өҫкә ташлау, өҫкә ырғытыу; **взбро́сить ка́мни** таштарҙы өҫкә ырғытыу **2.** (*вскинуть*) кинәт күтәреү; **взбро́сить ружьё** мылтыҡты кинәт күтәреү

**ВЗБРЫ́КИВАТЬ** *несов. см.* **взбрыкну́ть**

**ВЗБРЫКНУ́ТЬ** *сов.* (*о животных*) тибеп ебәреү, тибеү

**ВЗБУГРИ́ТЬ** *сов.* ҡалҡыу итеү

**ВЗБУГРИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡалҡыуланыу

**ВЗБУДОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **взбудора́жить**

**ВЗБУДОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **взбудора́житься 2.** *страд. от* **взбудора́живать**

**ВЗБУДОРА́ЖИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ығы-зығы тыуҙырыу, ҡуҙғытыу, ярһытыу

**ВЗБУДОРА́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ығы-зығы килеү, ҡуҙғыу, ярһыу

**ВЗБУНТОВА́ТЬ** *сов. кого-что* баш (бунт) күтәртеү, болаға ҡотортоу (өндәү)

**ВЗБУНТОВА́ТЬСЯ** *сов.* бола күтәреү (сығарыу), күтәрелеү; **солда́ты взбунтова́лись** һалдаттар баш күтәрҙе

**ВЗБУРЛИ́ТЬ** *сов. что* күбекләндереү, күбекләү

**ВЗБУХА́ТЬ** *несов. см.* **взбу́хнуть**

**ВЗБУ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** бүртеү, күбеү, ҡабарыу, шешенеү; **по́чки на дере́вьях взбу́хли** ағас бөрөләре бүрткән; **взбу́хшие ве́ки** шешенгән күҙ ҡабаҡтары **2.** (*о реке, ручье*) ташып сығыу, ташыу; **река́ взбу́хла** йылға ташып сыҡҡан

**ВЗБУ́ЧИТЬ I** *сов. кого-что*; *прост.* ныҡ туҡмау, ҡаты әрләү

**ВЗБУ́ЧИТЬ II** *сов. кого-что безл.*; *прост.* күбеү, ҡабарыу

**ВЗБУ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* күбенеү, ҡабарыныу

**ВЗБУ́ЧКА** *ж*; *прост.* **1.** (*побои*) туҡмау, биргеләп (туҡмап) алыу; **дать взбу́чку** биргеләп алыу **2.** (*выговор*) әрләнеү, һүгелеү, ҡаты шелтә; **получи́ть взбу́чку** әрләнеп алыу

**ВЗБУШЕВА́ТЬСЯ** *сов.*; *трад.-поэт.* (*о ветре, море и т.п.*) кинәт ҡотороноп китеү, дауыллай башлау; **пого́да взбушева́лась** көн дауыллай (боҙола) башланы

**ВЗВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **взвали́ть**

**ВЗВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взвали́ться 2.** *страд. от* **взва́ливать**

**ВЗВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*ношу*) йөкмәтеү, күтәртеү, һалыу; **взвали́ть мешо́к муки́ на плечо́** бер тоҡ ондо яурынға һалыу **2.** *что*; *перен.*, *разг.* (*обременить чем-л.*) йөкләтеү, ауҙарыу; **взвали́ть рабо́ту** эш йөкләтеү **3.** *что*; *перен.*, *разг.* (*приписать*) япһарыу, ауҙарыу, һылтау; **взвали́ть вину́ на друго́го** ғәйепте кемгәлер япһарыу

**ВЗВАЛИ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что*; *разг.* (*грузно лечь, сесть на что-л.*) йәйелеп ятыу

**ВЗВЕ́СИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* үлсәү, ауырлыҡты үлсәү; **взве́сить мешо́к** тоҡто үлсәү **2.** *что*; *перен.* үлсәп (уйлап, тикшереп) ҡарау; **взве́сить все до́воды** барлыҡ дәлилдәрҙе лә тикшереп ҡарау

**ВЗВЕ́СИТЬСЯ** *сов.* үлсәнеү

**ВЗВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (*ведя, помочь подняться*) күтәреү, өҫкә мендереү **2.** (*соорудить, построить*) һалыу, төҙөү, күтәреү **3.** (*приписать кому-л.*) япһарыу, ябыу, ауҙарыу, яғыу, тағыу; **взвести́ клевету́** яла яғыу ♦ **взвести́ куро́к** тәтене күтәреү

**ВЗВЕСТИ́СЬ** *сов.* (*встать на боевой взвод — об оружии*) ҡоролоу; **куро́к легко́ взвёлся** тәте еңел ҡоролдо

**ВЗВЕ́ШИВАНИЕ** *с см.* **взве́сить**

**ВЗВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **взве́сить**

**ВЗВЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взве́ситься 2.** *страд. от* **взве́шивать**

**ВЗВИВА́ТЬ** *несов. см.* **взвить**

**ВЗВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взви́ться 2.** *страд. от* **взвива́ть**

**ВЗВИЗГ** *м*; *разг.* сыйылдау, сыйылдау тауышы, сәрелдәү тауышы, һыҙғырыу; **взвизг пу́ли** пуля һыҙғырыуы

**ВЗВИ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **взви́згнуть**

**ВЗВИ́ЗГНУТЬ** *сов.* сыйылдап ебәреү (ҡуйыу), сәрелдәп ебәреү (ҡуйыу)

**ВЗВИНТИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ярһытыу, ҡуҙғытыу, тулҡынландырыу; **не́рвы взви́нчены** нервылары ярһыған ♦ **взвинти́ть це́ны** хаҡты саманан тыш күтәреү, самаһыҙ арттырыу

**ВЗВИНТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ярһыу, ҡуҙғыу, тулҡынланыу; **не́рвы взвинти́лись** нервылар ярһыны (ҡуҙғыны)

**ВЗВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **взвинти́ть**

**ВЗВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взвинти́ться 2.** *страд. от* **взви́нчивать**

**ВЗВИТЬ** *сов. что* күтәреү, өйрөлтөп күтәреү; **ве́тер взвил пыль** ел саңды өйрөлтөп күтәрҙе

**ВЗВИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡапыл өҫкә күтәрелеү, өҫкә атылыу, шыҡыйып осоу; **орёл взви́лся под облака́** бөркөт шыҡыйып болоттарға инеп китте

**ВЗВИ́ХРИТЬ** и **ВЗВИХРИ́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* өйөрөлдөрөү, ойоҡһотоп күтәреү, өйөрөп күтәреү; **ветéр взви́хрил сне́жную пыль** ел ҡарҙы ойоҡһотоп күтәрҙе

**ВЗВИХРИ́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* (о *волосах*) туҙғытыу, туҙҙырыу

**ВЗВИ́ХРИТЬСЯ** и **ВЗВИХРИ́ТЬСЯ I** *сов.* ойоҡһотоп күтәрелеү, өйөрөлөп күтәрелеү

**ВЗВИХРИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* (*о волосах*) туҙғыу, туҙыу

**ВЗВОД I** *м*; *воен.* взвод; **пехо́тный взвод** пехота взводы

**ВЗВОД II** *м* тәте, взвод (*атыу ҡоралының сирткесте ысҡындыра торған ырғаҡ рәүешендәге өлөшө*); **пистоле́т на взво́де** пистолет тәтегә ҡуйылған ♦ **быть на взво́де** ҡыҙмаса булып алыу

**ВЗВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **взвести́**

**ВЗВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взвести́сь 2.** *страд. от* **взводи́ть**

**ВЗВОДНО́Й,** -ая, -ое взвод ...ы; **взводна́я пружи́на** тәте пружинаһы

**ВЗВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** взвод ...ы; **взво́дный команди́р** взвод командиры **2.** *в знач. сущ.* **взво́дный** *м* взвод командиры

**ВЗВОЛНО́ВАННОСТЬ** *ж* тынысһыҙлыҡ, тулҡынланыу

**ВЗВОЛНО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **взволнова́ть**; **она́ была́ взволно́вана встре́чей** уны осрашыу тулҡынландырған ине **2.** *прил.* (*встревоженный*) тулҡынланған, борсоулы; **взволно́ванный вид** тулҡынланған ҡиәфәт **3.** *прил.* (*выражающий волнение*) тулҡынланған; **говори́ть взволно́ванным го́лосом** тулҡынланған тауыш менән һөйләү

**ВЗВОЛНОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тулҡындырыу, тулҡынландырыу; **ве́тер взволнова́л о́зеро** ел күлде тулҡындырҙы **2.** *кого-что* әҫәрләндереү, йөрәкһетеү, тулҡынландырыу, борсоу; **разгово́р его́ взволнова́л** һөйләшеү уны йөрәкһетте

**ВЗВОЛНОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тулҡынланыу, тулҡыныу **2.** борсолоу, әҫәрләнеү, йөрәкһеү, тулҡынланыу, тынысһыҙланыу

**ВЗВОЛО́ЧЬ** *сов. кого-что*; *прост.* (үргә) һөйрәп мендереү

**ВЗВОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **взвороти́ть**

**ВЗВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **взвора́чивать**

**ВЗВОРОТИ́ТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** (*взвалить*) көскә күтәреп һалыу **2.** (*ворочая, привести в беспорядок*) аҫтын-өҫкә әйләндереү, болартыу

**ВЗВЫТЬ** *сов.* **1.** (*о животных*) олоп ебәреү, сыйылдап ебәреү **2.** *разг.* (*громко заплакать*) үкереп (аҡырып) илап ебәреү

**ВЗГЛЯД** *м* **1.** ҡараш, ҡарау, күҙ ҡарашы; **печа́льный взгляд** ҡайғылы ҡараш; **при́стальный взгляд** текләп ҡарау; **бро́сить взгляд** ҡараш ташлау, күҙ төшөрөү; **обменя́ться взгля́дами** ҡараш (күҙ) ташлау, ҡарашып аңлашыу **2.** ҡараш, фекер; **пра́вильный взгляд** дөрөҫ ҡараш; **разделя́ть взгля́ды** ҡарашын уртаҡлашыу, фекеренә ҡушылыу ♦ **на взгля́д** ҡарап торғанда, тыштан ҡарағанда; **на мой (твой, его́ и т.д.) взгляд** минеңсә (һинеңсә, уныңса һ.б.), минең фекеремсә (һинең фекереңсә, уның фекеренсә); **на пе́рвый взгляд** беренсе (тәү) ҡарашҡа; **с пе́рвого взгля́да**: 1) шунда уҡ; 2) тәү ҡарамаҡҡа, тәү ҡарашҡа

**ВЗГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **взгляну́ть**

**ВЗГЛЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡарап алыу, күҙ ташлау (һалыу); **взгляну́ть в лицо́** йөҙөнә ҡарап алыу **2.** *перен.* иғтибар итеү, ҡарау; **взгляну́ть на де́ло** эшкә иғтибар итеү (ҡарау)

**ВЗГО́РОК** *м*; *разг.* түбә, түмәләс

**ВЗГО́РЬЕ** *с*; *разг.* ҡалҡыулыҡ

**ВЗГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **взгреть**

**ВЗГРЕТЬ** *сов. кого*; *прост.* туҡмау, ныҡ әрләү, шелтәләү, ҡыҙҙырыу

**ВЗГРОМОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **взгромозди́ть**

**ВЗГРОМОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взгромозди́ться 2.** *страд. от* **взгроможда́ть**

**ВЗГРОМОЗДИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* өҫтө-өҫтөнә бейек итеп өйөү (тейәү, мендереү)

**ВЗГРОМОЗДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* көс-хәл менән менеү (күтәрелеү), менеп ултырыу

**ВЗГРУСТНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* күңелһеҙләнеп китеү, эс бошоп китеү, яманһыулау

**ВЗГРУСТНУ́ТЬСЯ** *сов. безл.*; *разг.* (*о внезапном чувстве грусти, печали*) күңелһеҙләнеп (эс бошоп) китеү, күңелһеҙ булып китеү, яманһыулай башлау; **мне взгрустну́лось** миңә күңелһеҙ булып китте

**ВЗДВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **вздво́ить**

**ВЗДВО́ИТЬ** *сов. что* ике рәт итеп теҙеү, ике рәт итеү

**ВЗДВОИ́ТЬ** *сов. что*; *с.-х.* икенсе тапҡыр һөрөү, яңынан һөрөү

**ВЗДВО́ИТЬСЯ** *сов.* ике рәткә теҙелеү

**ВЗДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **вздеть**

**ВЗДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **вздёрнуть**

**ВЗДЁРГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вздёрнуться 2.** *страд. от* **вздёргивать**

**ВЗДЁРНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вздёрнуть 2.** *прил.* өҫкә ҡараған, сәкәйгән (*танау, яурындар һ.б.*); **вздёрнутый нос** сәкәйгән танау

**ВЗДЁРНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* тартып күтәреү (мендереү), өҫкә күтәреү **2.** *кого*; *прост.* аҫыу, аҫып үлтереү ♦ **вздёрнуть нос** танау күтәреү, һауаланыу, эреләнеү; **вздёрнуть плеча́ми** яурын һикертеү (*аңлашылмауҙы, ризаһыҙлыкты белдереп*)

**ВЗДЁРНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* өҫкә күтәрелеү, өҫкә тартылыу

**ВЗДЕТЬ** *сов.* **1.** *уст.* өҫкә күтәреү, төбәү; **вздеть глаза́ к потолку́** күҙҙәрҙе түшәмгә төбәү **2.** *уст., прост.* кейеү, кейҙереү **3.** *прост.* (*насадить, нанизать на что-л.*) кейҙереү, теҙеү

**ВЗДОР** *м*; *разг.* юҡ-бар (буш, мәғәнәһеҙ) һүҙ, сафсата; **нести́ вздор** юҡ-бар һүҙ һөйләү

**ВЗДО́РИТЬ** *несов.*; *разг.* талашыу, ыҙғышыу, әрләшеү

**ВЗДО́РНОСТЬ** *ж* **1.** мәғәнәһеҙлек, нигеҙһеҙлек; **вздо́рность болтовни́** һүҙҙең мәғәнәһеҙлеге **2.** ыҙғыш-талашҡа әүәҫлек, ыҙғышыусанлыҡ; **вздо́рность челове́ка** кешенең ыҙғышыусанлығы

**ВЗДО́РНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** юҡ-бар, мәғәнәһеҙ, буш; **вздо́рный слух** юҡ-бар хәбәр **2.** ыҙғышыусан, ыҙғыш-талашҡа әүәҫ; **вздо́рный челове́к** ыҙғышыусан кеше

**ВЗДОРОЖА́ТЬ** *сов.* ҡыйбатланыу, ҡиммәтләнеү, хаҡы артыу (күтәрелеү)

**ВЗДОХ** *м* тын (һулыш) алыу, тәрән һулау, көрһөнөү ♦ **испусти́ть после́дний вздох** үлеү, вафат булыу, һуңғы һулышты алыу

**ВЗДОХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** тын алыу, ауыр һулау, көрһөнөү; **вздохни́те глу́бже** тәрәнерәк тын алығыҙ **2.** *разг.* ял итеп алыу, хәл алыу, тын алыу; **я уста́л, да́йте вздохну́ть** мин арыным, ял итеп алырға ирек бирегеҙ ♦ **вздохну́ть свобо́дно (свобо́днее)** тынысланып ҡалыу, тын алып ҡалыу

**ВЗДРА́ГИВАТЬ** *несов. см.* **вздро́гнуть** I

**ВЗДРЕМНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* серем итеп алыу

**ВЗДРО́ГНУТЬ** *сов.* һиҫкәнеү, тертләү, һиҫкәнеп (тертләп, ҡалтырап) китеү; **он вздро́гнул от испу́га** ул ҡурҡыуынан һиҫкәнеп китте

**ВЗДУВА́ТЬ** *несов. см.* **вздуть** I

**ВЗДУВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взду́ться 2.** *страд. от* **вздува́ть**

**ВЗДУ́МАТЬ** *сов.*; *разг.* ҡапыл уйлау, уйлап алыу, ҡапыл -маҡсы/-мәксе булыу, ҡапыл -ға/-гә булыу; **я взду́мал заня́ться спо́ртом** мин спорт менән шөғөлләнергә булдым ♦ **не взду́май(те)** *с неопр.* уйламағыҙ ҙа, башығыҙға ла (уйығыҙға ла) килтермәгеҙ

**ВЗДУ́МАТЬСЯ** *сов. безл.*; *разг.* ҡапыл (кинәт) бер уйға килеү, көтмәгәндә бер фекергә килеү; **мне взду́малось пойти́ в кино́** ҡапыл башыма киноға барыу уйы килде

**ВЗДУРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* аҡылһыҙланыу, тилеләнеү, шашыныу

**ВЗДУ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **взду́ться 2.** (*припухлость*) шешмәк

**ВЗДУ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вздуть** I; **2.** *прил.* (*распухший*) күпкән, шешенгән; **взду́тый живо́т** күпкән ҡорһаҡ **3.** *прил.*; *перен.* (*чрезмерно повышенный*) артыҡ күтәрелгән, артыҡ ҡабартылған; **взду́тые це́ны** артыҡ күтәрелгән хаҡтар

**ВЗДУТЬ I** *сов. что* **1.** иҫеп (өрөп) күтәреү, өрөп осороу; **ве́тер вздул песо́к** ел өрөп ҡомдо күтәрҙе **2.** (*раздуть, надуть*) ҡабартыу, күбендереү; **у меня́ взду́ло щёку** *безл.* яңағым ҡабарып сыҡты **3.** *перен., разг.* (*поднять цены*) хаҡты күтәреү; **вздуть це́ны** хаҡтарҙы артыҡ күтәреү **4.** *прост.* (*разжечь*) тоҡандырыу, ҡабыҙыу; **вздуть ого́нь** ут тоҡандырыу

**ВЗДУТЬ II** *сов. кого*; *прост.* туҡмап ташлау, бешеү, кәрәген биреү

**ВЗДУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*надуться*) ҡабарыу; **паруса́ взду́лись** елкәндәр ҡабарҙы **2.** (*подняться выше обычного уровня*) күтәрелеү, артыу; **река́ взду́лась по́сле проливны́х дожде́й** ҡойоп яуған ямғырҙан һуң йылға күтәрелде **3.** (*вспухнуть*) ҡабарып сығыу, күбеп сығыу, шешенеү; **щека́ взду́лась** яңаҡ шешенгән **4.** *перен.*; *разг.* (*увеличиться — о ценах*) хаҡ күтәрелеү (артыу)

**ВЗДЫ́БИТЬ** *сов. кого* үрә торғоҙоу, арт аяғына баҫтырыу (*атты*); **взды́бить коня́** атты үрә торғоҙоу

**ВЗДЫ́БИТЬСЯ** *сов.* **1.** үрә тороу, арт аяғына баҫыу (*ат тураһында*) **2.** (*подняться кверху*) өҫкә күтәрелеү, үрә тороу; **во́лосы взды́бились** сәстәр үрә торҙо

**ВЗДЫ́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **взды́бить**

**ВЗДЫ́БЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **взды́биться**

**ВЗДЫМА́ТЬ** *несов. что* борҡотоу, күтәреү, туҙҙырыу; **вздыма́ть пыль** саң күтәреү

**ВЗДЫМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*подниматься кверху*) өҫкә күтәрелеү, олғашыу; **раке́ты вздыма́лись к не́бу** ракеталар һауаға олғашты; **во́лны вздыма́лись** тулҡындар өҫкә күтәрелде **2.** (*о груди*) ҡалҡыу; **грудь вздыма́лась** күкрәге ҡалҡты **3.** *страд. от* **вздыма́ть**

**ВЗДЫХА́НИЕ** *с* тын (һулыш) алыу, һулыш

**ВЗДЫХА́ТЕЛЬ** *м*; *разг., шутл.* ғишыҡ тотоусы

**ВЗДЫХА́ТЬ** *несов.* **1.** көрһөнөү, ауыр һулау, уфылдау; **тяжело́ вздыха́ть** ауыр итеп көрһөнөү **2.** *о ком-чём, по ком-чём* яманһыулау, һағыныу, юҡһыныу **3.** *по ком*; *разг., уст.* яратып йөрөү, ғашиҡ булыу

**ВЗИМА́НИЕ** *с см.* **взима́ть**

**ВЗИМА́ТЬ** *несов. что* (*взыскивать*) түләтеү, алыу, йыйыу; **взима́ть по́шлину** пошлина түләтеү

**ВЗИМА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **взима́ть**

**ВЗИРА́НИЕ** *с*; *уст.* ҡарау

**ВЗИРА́ТЬ** *несов. на кого-что* ҡарау, ҡарап тороу

**ВЗЛА́МЫВАНИЕ** *с* ватыу

**ВЗЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **взлома́ть**

**ВЗЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взлома́ться 2.** *страд. от* **взла́мывать**

**ВЗЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **взлезть**

**ВЗЛЕЗТЬ** *сов.* үрмәләп менеү, менеү, күтәрелеү

**ВЗЛЕЛЕ́ЯТЬ** *сов.* **1.** *кого* иркәләп (һөйөп) үҫтереү; **взлеле́ять дочь** ҡыҙҙы иркәләп үҫтереү **2.** *что*; *перен.* (уй, фекер) йөрөтөү, тыуҙырыу; **взлеле́ять наде́жду** ышаныс тыуҙырыу

**ВЗЛЁТ** *м* **1.** *см.* **взлете́ть**; **во вре́мя взлёта** осоп күтәрелгәндә **2.** *чего*; *перен.* күтәрелеш, осош; **взлёт нау́чного тво́рчества** фәнни ижад күтәрелеше

**ВЗЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **взлете́ть**

**ВЗЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (осоп) күтәрелеү, осоп менеү; **раке́та взлете́ла** ракета күтәрелде; **пти́ца взлете́ла на скалу́** ҡош ҡаяға осоп менде **2.** *разг.* (*взбежать наверх*) йүгереп менеү, атылып менеү; **взлете́ть на ле́стницу** баҫҡысҡа атылып менеү ♦ **взлете́ть на во́здух**: 1) көлө күккә осоу (*шартлау*); 2) юҡҡа сығыу, емерелеү (*өмөт, хыял, план һ.б.*)

**ВЗЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое осоп менеү ...ы, осоп күтәрелеү ...ы; **взлётная доро́жка** осоп күтәрелеү юлы

**ВЗЛОМ** *м см.* **взлома́ть**; **взлом замка́** йоҙаҡты ватып асыу

**ВЗЛОМА́ТЬ** *сов. что* **1.** ватыу, ватып асыу, емереү, аҡтарып ташлау; **взлома́ть дверь** ишекте ватыу; **взлома́ть пол** иҙәнде аҡтарып ташлау **2.** *воен.* өҙөү, емереү; **взлома́ть оборо́ну проти́вника** дошман оборонаһын емереү

**ВЗЛОМА́ТЬСЯ** *сов.* (*о льде*) аҡтарылып асылыу

**ВЗЛО́МЩИК** *м* йоҙаҡ ватыусы, йорт-йыһаз ҡарағы

**ВЗЛОХМА́ТИТЬ** *сов. что* туҙҙырыу, туҙғытыу, тырпайтыу; **взлохма́тить во́лосы** сәс(тәрҙе) туҙҙырыу

**ВЗЛОХМА́ТИТЬСЯ** *сов.* туҙыу, туҙғыу, тырпайыу; **во́лосы взлохма́тились** сәстәр туҙып бөткән

**ВЗЛОХМА́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **взлохма́тить 2.** *прил.* туҙған, туҙғыған, тырпайған

**ВЗЛОХМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **взлохма́тить**

**ВЗЛОХМА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взлохма́титься 2.** *страд. от* **взлохма́чивать**

**ВЗЛУЩИ́ТЬ** *сов. что*; *с.-х.* йомшартыу (*тупраҡта дым һаҡлау өсөн*)

**ВЗМАХ** *м* һелтәү, ҡағыу; **взмах кры́льев** ҡанаттарҙы ҡағыу

**ВЗМА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **взмахну́ть**

**ВЗМАХНУ́ТЬ** *сов. чем* һелтәү, болғау; (*о крыльях*) елпеү, ҡағыу; **взмахну́ть крыло́м** ҡанат ҡағыу; **взмахну́ть фура́жкой** фуражка болғау

**ВЗМАХНУ́ТЬСЯ** *сов.* тиҙ өҫкә күтәрелеү

**ВЗМЕСТИ́** *сов. что* (ҡапыл) өҫкә күтәреү (ташлау), күтәреп ебәреү

**ВЗМЁТ** *м* **1.** *см.* **взмета́ть** — **взметну́ть**; **взмёт пла́мени** ялҡындың өҫкә күтәрелеүе **2.** *с.-х.* һөрөү, күтәреү; **взмёт па́ра** пар күтәреү; **взмёт зя́би** туңға һөрөү

**ВЗМЕТА́ТЬ I** *сов. что* **1.** борҡотоу, күтәреү, туҙҙырыу; **взмета́ть пыль** саң борҡотоу **2.** *с.-х.* һөрөү, күтәреү; **взмета́ть пар** пар күтәреү

**ВЗМЕТА́ТЬ II** *несов. см.* **взмести́**

**ВЗМЕТНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (ҡапыл) өҫкә осороу, юғарыға ырғытыу, һауаға сөйөү, аҡтарып ташлау; **взрыв ми́ны взметну́л зе́млю** мина шартлауы ерҙе аҡтарып ташланы; **ве́тер взметну́л ли́стья** ел япраҡтарҙы ҡапыл өҫкә осорҙо **2.** *чем* (*взмахнуть*) һелтәү, сайҡау, сөйөү; **взметну́ть голово́й** баш сайҡау

**ВЗМЕТНУ́ТЬСЯ** *сов.* өҫкә күтәрелеү, юғарыға ынтылыу, атылыу, һикереү, ырғыу; **раке́та взметну́лась к не́бу** ракета һауаға атылды; **ры́ба взметну́лась** балыҡ өҫкә ырғый **2.** (*стремительно вскочить*) ырғып (һикереп) тороу, ырғып һикереп китеү; **во́лки взметну́лись** бүреләр һикереп торҙо

**ВЗМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **взмета́ть** I — **взметну́ть**

**ВЗМЁТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взметну́ться 2.** *страд. от* **взмётывать**

**ВЗМОКА́ТЬ** *несов. см.* **взмо́кнуть**

**ВЗМО́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* һыуланыу, еүешләнеү, сыланыу; **спина́ моя́ взмо́кла** арҡам һыуланды

**ВЗМОЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ялыныу, үтенеү, ялбарыу, ялынып һорау, үтенеп һорау; **он взмоли́лся о поща́де** ул мәрхәмәт һорап ялынды

**ВЗМО́РЬЕ** *с* диңгеҙ буйы (яры); **гуля́ть по взмо́рью** диңгеҙ буйында йөрөү

**ВЗМУТИ́ТЬ** *сов. что* болғансыҡлау, буръяҡландырыу (*һыуҙы, шыйыҡлыҡты һ.б.*)

**ВЗМУТИ́ТЬСЯ** *сов.* болғансыҡланыу, буръяҡланыу

**ВЗМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **взмыть**

**ВЗМЫ́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **взмы́лить 2.** *прил.* (*о лошади*) аҡ күбеккә төшкән (батҡан)

**ВЗМЫ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **взмы́лить**

**ВЗМЫ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **взмы́литься 2.** *страд. от* **взмы́ливать**

**ВЗМЫ́ЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* (*воду*) һабынлау, күбекләндереү **2.** (*о лошади*) аҡ күбеккә батырыу (төшөрөү); **взмы́лить коня́** атты аҡ күбеккә төшөрөү

**ВЗМЫ́ЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*образовать пену*) һабынланыу, күбекләнеү **2.** (*о лошади*) аҡ күбеккә батыу (төшөү)

**ВЗМЫТЬ** *сов.* (*быстро взлететь*) ҡапыл осоп күтәрелеү, юғарыға күтәрелеү, атылыу; **самолёт взмыл вверх** самолёт юғарыға күтәрелде

**ВЗНОС** *м* **1.** (*внесение денег*) түләү, аҡса түләү; **сро́чный взнос** ашығыс түләү **2.** взнос; **чле́нский взнос** ағзалыҡ взносы; **вступи́тельный взнос** инеү взносы

**ВЗНУЗДА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* ауыҙлыҡлау, ауыҙлыҡ кейҙереү **2.** *кого-что*; *перен.*, *прост.* ауыҙлыҡлау, буйһондороу, тыйыу; **взнузда́ть ре́ку** йылғаны ауыҙлыҡлау

**ВЗНУ́ЗДЫВАТЬ** *несов. см.* **взнузда́ть**

**ВЗО...** *приставка см.* **вз...**

**ВЗОБРА́ТЬСЯ** *сов.* тырмашып менеү, үрмәләп менеү, менеп етеү; **взобра́ться на верши́ну горы́** тау түбәһенә менеп етеү

**ВЗОЙТИ́** *сов.* **1.** күтәрелеү, менеү; **взойти́ на го́ру** тауға күтәрелеү **2.** (*о небесных светилах*) ҡалҡыу, тыуыу, сығыу, күтәрелеү; **со́лнце взошло́** ҡояш сыҡты (ҡалҡты); **взошла́ луна́** ай тыуҙы **3.** *разг.* (*подняться — о тесте*) ҡабарыу, ҡабарып сығыу, күтәрелеү; **те́сто взошло́** ҡамыр ҡабарҙы **4.** (*прорасти*) шытып сығыу; **все семена́ взойду́т** бөтә орлоҡтар ҙа шытып сығасаҡ

**ВЗОР** *м* **1.** ҡараш, ҡарау, күҙ ҡарашы; **вду́мчивый взор** уйсан ҡараш; **устреми́ть взор** күҙ ҡарашын йүнәлдереү **2.** *обычно мн.* **взо́ры**; *перен.* (*внимание*, *интерес*) иғтибар, ҡыҙыҡһыныу; **взо́ры всех бы́ли прико́ваны к э́тим собы́тиям** бөтәһенең иғтибары ошо ваҡиғаға йүнәлтелгәйне

**ВЗОРВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* шартлатыу, емереү; **взорва́ть лёд** боҙҙо шартлатыу **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*возмутить*) асыуландырыу, асыуын ҡабартыу, сығырынан сығарыу; **его́ слова́ взорва́ли меня́** уның һүҙҙәре мине сығырымдан сығарҙы

**ВЗОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** шартлау, (шартлап) ярылыу; **грана́та взорвала́сь** граната шартланы **2.** *перен.*, *разг.* (*возмутиться*) ныҡ асыуланыу, асыу ташыу, сығырҙан сығыу; **вдруг учи́тель взорва́лся** уҡытыусы ҡапыл сығырынан сыҡты

**ВЗРАСТИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *высок.* (*вырастить*) тәрбиәләп үҫтереү, ҡарап үҫтереү

**ВЗРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **взрасти́ть**

**ВЗРА́ЩИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **взра́щивать**

**ВЗРЕВЕ́ТЬ** *сов.* **1.** үкереп ебәреү; **зверь взреве́л** йәнлек үкереп ебәрҙе **2.** (*вскричать*) аҡырып (ҡысҡырып) ебәреү, аҡырыу; **взреве́ть исто́шным го́лосом** әсе тауыш менән аҡырып ебәреү **3.** (*о резких и громких звуках машин*) үкереү; **теплово́з взреве́л** тепловоз үкереп ебәрҙе

**ВЗРЕЗ** *м* **1.** *см.* **взре́зать — взреза́ть 2.** (*прорез*) ҡырҡылған урын

**ВЗРЕ́ЗАТЬ** *сов. что* киҫеп (ярып) ебәреү, ҡырҡыу, ярыу; **взре́зать арбу́з** ҡарбуз(ды) ярыу

**ВЗРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **взре́зать**

**ВЗРОСЛЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* ҙурайыу, үҫеү, буйға етеү, ир ҡорона ултырыу

**ВЗРО́СЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** балиғ булған, ҙурайған, буйға еткән, өлкән; **взро́слый ю́ноша** балиғ булған егет; **взро́слая дочь** буйға еткән ҡыҙ **2.** *в знач. сущ.* **взро́слые** *мн.* ололар, өлкәндәр, ҙурҙар; **взро́слые и де́ти** ололар һәм балалар **3.** (*достигший полной зрелости — о животных, птицах и т.п.*) оло; **взро́слые ко́ни** оло аттар

**ВЗРЫВ** *м* **1.** шартлау; **взрыв снаря́да** снаряд шартлауы **2.** (*разрушение*) шартлатыу, шартлатып емереү; **взрыв моста́** күперҙе шартлатыу **3.** *перен.* ҡапыл күтәрелеш, сағылыш; **взрыв аплодисме́нтов** көслө ҡул сабыуҙар; **взрыв сме́ха** геү килеп шарҡылдап көлөү

**ВЗРЫВА́ТЕЛЬ** *м*; *воен.* шартлатҡыс

**ВЗРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **взорва́ть**

**ВЗРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **взрыть**

**ВЗРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **взорва́ться 2.** *страд. от* **взрыва́ть** I

**ВЗРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **взрыва́ть** II

**ВЗРЫВНИ́К** *м*; *разг.* шартлатыусы; **рабо́тать взрывнико́м** шартлатыусы булып эшләү

**ВЗРЫВНО́Й,** -ая, -ое **1.** шартлау ...ы, шартлатыу ...ы, шартлаулы, шартлай торған; **взрывны́е рабо́ты** шартлатыу эштәре; **взрывна́я волна́** шартлау тулҡыны; **взрывно́й снаря́д** шартлаулы снаряд **2.** *лингв.* шартлаулы; **взрывно́й звук** шартлаулы өн

**ВЗРЫВЧА́ТКА** *ж*; *разг.* шартлатҡыс

**ВЗРЫ́ВЧАТЫЙ,** -ая, -ое шартлаусан, шартлай торған; **взры́вчатые вещества́** шартлаусан матдәләр

**ВЗРЫТЬ** *сов. что* ҡаҙыу, ҡаҙып бөтөрөү (сығыу), ҡаҙып йомшартыу; **взрыть зе́млю** ерҙе ҡаҙып йомшартыу

**ВЗРЫХЛИ́ТЬ** *сов. что* (ҡаҙып) йомшартыу, көпшәкләндереү; **взрыхли́ть по́чву** тупраҡты ҡаҙып йомшартыу

**ВЗРЫХЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **взрыхли́ть**

**ВЗЪ...** *приставка см.* **вз...**

**ВЗЪЕДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **взъе́сться**

**ВЗЪЕРЕПЕ́НИТЬ** *сов. кого*; *прост.* асыуландырыу, киреләндереү, тиҫкәреләндереү, кәзәләндереү

**ВЗЪЕРЕПЕ́НИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* асыуланып китеү, киреләнеү, тиҫкәреләнеү, кәзәләнеү

**ВЗЪЕРО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **взъеро́шить 2.** *прил.* туҙғыған, туҙылған, тырпайған, туҙғыған йөнлө, ялбыраған, ялбыр; **взъеро́шенные во́лосы** тырпайған сәс; **взъеро́шенный медве́дь** туҙғыған йөнлө айыу

**ВЗЪЕРО́ШИВАТЬ** *несов. см.* **взъеро́шить**

**ВЗЪЕРО́ШИВАТЬСЯ** *несов. см.* **взъеро́шиться**

**ВЗЪЕРО́ШИТЬ** *сов. что*; *разг.* туҙғытыу, тырпайтыу, ҡабартыу

**ВЗЪЕРО́ШИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туҙғыу, тырпайыу, ҡабарыу; **усы́ взъеро́шились** мыйыҡтар(ы) тырпайған

**ВЗЪЕ́СТЬСЯ** *сов. на кого-что*; *разг.* ҡаныҡыу, йәбешеү

**ВЗЪЕ́ХАТЬ** *сов.* менеү (*ҡалҡыу урынға*); **взъе́хать на бе́рег** ярға менеү

**ВЗЪЯРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* асыуландырыу, асыуына тейеү, ярһытыу

**ВЗЪЯРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* асыуланыу, ярһыу

**ВЗЫВА́ТЬ** *несов. к кому-чему, о чём*; *высок.* (*призывать*) өндәү, саҡырыу; **взыва́ть к справедли́вости** ғәҙеллеккә саҡырыу; **взыва́ть о по́мощи** ярҙамға саҡырыу

**ВЗЫГРА́ТЬ** *сов.* **1.** уйынсаҡланыу, уйнаҡлау, кәйефләнеү; **конь взыгра́л** ат уйынсаҡлана башланы **2.** ҡотороу, хәрәкәткә килеү, тулҡынланыу; **мо́ре взыгра́ло** диңгеҙ ҡоторондо ♦ **взыгра́ла душа́**; **взыгра́ло се́рдце** күңел күтәрелеп китте

**ВЗЫСКА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **взыскать** 1; **2.** (*наказание*) яза, шелтә; **дисциплина́рное взыска́ние** дисциплинар яза; **наложи́ть взыска́ние** шелтә биреү

**ВЗЫСКА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* талапсанлыҡ; **прояви́ть взыска́тельность** талапсанлыҡ күрһәтеү

**ВЗЫСКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое талапсан; **взыска́тельный кри́тик** талапсан тәнҡитсе

**ВЗЫСКА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, с кого* түләтеү, түләттереү; **взыска́ть нало́г** һалым түләтеү; **взыска́ть штраф** штраф түләтеү **2.** *с кого-чего* и *без доп.* (*привлечь к ответственности*) яза биреү, яуапҡа тарттырыу ♦ **не взыщи́(те)** ғәйепкә алма(ғыҙ), ғәйеп итмә(геҙ)

**ВЗЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **взыска́ть** 1

**ВЗЫ́СКИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **взы́скивать**

**ВЗЯ́ТИЕ** *с* (баҫып) алыу, алыныу; **взя́тие укрепле́ния** нығытманы алыу; **взя́тие вла́сти** власты алыу

**ВЗЯ́ТКА** *ж* **1.** ришүәт; **брать взя́тку** ришүәт алыу **2.** (*в картах*) взятка ♦ **взя́тки гла́дки** *с кого* бер нәмә лә ала (эшләтә, таптыра) алмайһың

**ВЗЯ́ТОК** *м*; *пчел.* табыш, бал йыйымы (*бал ҡорттарының бер ваҡытта йыйған балы*)

**ВЗЯ́ТОЧНИК** *м* и **ВЗЯ́ТОЧНИЦА** *ж* ришүәтсе, ришүәт алыусы

**ВЗЯ́ТОЧНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ришүәт ...ы, ришүәтселек ...ы; **взя́точнические приёмы** ришүәтселек алымдары

**ВЗЯ́ТОЧНИЧЕСТВО** *с* ришүәтселек, ришүәт алыу

**ВЗЯТЬ** *сов.* **1.** *см.* **брать** 1—3, 5—13; **2.** *кого-что* (*арестовать*) ҡулға алыу; **взять престу́пника** енәйәтсене ҡулға алыу **3.** *что* (*в сочетании с союзами "да", "и", "да и"*) тотоу, тоторға; **возьму́ да скажу́** тотормон да әйтермен; **взять и пое́хать** тоторға ла китергә **4.** *кого-что* (*в сочетании с частицами "хотя", "хотя бы"*) алыу, алып ҡарау; **взять хотя́ бы учителе́й** уҡытыусыларҙы алып ҡарайыҡ; **возьми́ хоть сестру́** апайыңды ғына ал ♦ **взять быка́ за рога́** ҡыйыу эш итеү; **взять верх** өҫтөнлөк алыу, өҫкә сығыу, еңеү; **взять приме́р** үрнәк алыу; **взять в свои́ ру́ки** үҙ ҡулы аҫтына алыу, буйһондороу; **взять себя́ в ру́ки** үҙеңде ҡулға алыу, тыйылыу; **на́ша взяла́** беҙҙең яҡ еңде; **не до́рого возьмёт** оҙаҡ уйлап тормай, уйлап тормайынса; **с чего́ (отку́да) он (она́ и т.д.) взял** ҡайҙан алды (нимәнән сығып әйтә) ул уны (*һығымта нимә нигеҙендә эшләнгән*)

**ВЗЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **бра́ться 2.** *разг.* үҫеп китеү, ерегеү; **я́блоня взяла́сь** алма ағасы үҫеп китте ♦ **взя́ться за ум** аҡылға килеү, берәй нәмә уйлап сығарыу; **отку́да ни возьми́сь** көтмәгәндә, уйламағанда, ҡапыл килеп сығыу

**ВИАДУ́К** *м* виадук (*соҡор, тарлауыҡ аша, таш һәм тимер юл өҫтөнән һалынған күпер*)

**ВИБРА́ТОР** *м*; *физ.* вибратор (*тирбәлеү хәрәкәтен барлыҡҡа килтереүсе прибор*)

**ВИБРА́ЦИЯ** *ж* **1.** *физ.* вибрация, тирбәлеү; **вибра́ция мото́ра** моторҙың вибрацияһы **2.** *муз.* ҡалтырау; **вибра́ция струны́** ҡылдың ҡалтырауы

**ВИБРИО́Н** *м* вибрион (*бактерия*); **вибрио́н холе́ры** ваба вибрионы

**ВИБРИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** тирбәлеү, вибрация яһау **2.** (*о голосе*) ҡалтырау

**ВИБРО́МЕТР** *м* виброметр (*вибрацияны үлсәү приборы*)

**ВИВА́РИЙ** *м*; *спец.* виварий (*тәжрибә үткәреү өсөн хайуандар урыны*)

**ВИВИСЕ́КТОР** *м* вивисектор (*вивисекция белгесе*)

**ВИВИСЕ́КЦИЯ** *ж* вивисекция (*берәй ағзаның функцияһын тикшереү маҡсатында тере организмға яһалған операция*)

**ВИГВА́М** *м* вигвам (*Төньяҡ Америка индеецтарының сыбыҡ-сабыҡтан, ҡабыҡ йәки тиренән яһалған ҡыуышы*)

**ВИГО́НЕВЫЙ,** -ая, -ое вигонь ...ы, вигонь, вигондән яһалған; **вигоневое пряде́ние** вигонь иләү; **вигоневый шарф** вигонь шарф

**ВИГО́НЬ** *ж* вигонь (**1.** *зоол. Көньяҡ Америкала йәшәгән һөтимәр хайуан (ламалар токомона ҡарай)* **2.** *шул хайуандың йөнө һәм унан һуғылған туҡыма* **3.** *мамыҡтан, шырт йөндән иләнгән еп һәм унан һуғылған туҡыма*)

**ВИД I** *м* **1.** (*внешность*) күренеш, тышҡы күренеш; **вид го́рной реки́** тау йылғаһы күренеше **2.** (*внешний облик как состояние*) ҡиәфәт, сырай, төҫ; **здоро́вый вид** сәләмәт төҫ; **больно́й вид** ауырыу төҫ; **лука́вый вид** шаян ҡиәфәт; **ва́жный вид** эре ҡиәфәт **3.** (*местность, видимая взором; зрелище*) күренеш; **вид из окна́** тәҙрә аша булған күренеш **4.** (*изображение местности, пейзаж*) һүрәт, тәбиғәт күренеше, пейзаж; **ви́ды Кры́ма** Ҡырым пейзажы **5.** *с предлогами*

“*в*”, “*из*”, “*на*”, “*при*” *образует наречные сочетания*: **в виду́**; **на виду́** күҙ уңында, күҙ алдында; **из ви́да (и́з виду)** күҙ уңынан, күҙҙән; **при ви́де** күргәс; **на виду́ у всех** бөтәһенең күҙ алдында; **скры́ться из ви́ду** күҙҙән юғалыу; **на виду́ у люде́й** кешеләрҙең күҙ алдында **6.** *мн.* **ви́ды** (*предположения, намерения*) теләк, ниәт, уй, иҫәп; **ви́ды на урожа́й** уңышҡа иҫәп; **ви́ды на бу́дущее** киләсәккә уй, хыял ♦ **вид на жи́тельство** *уст.* паспорт; **в ви́де** *чего* хәлдә, күренештә, рәүештә; **для ви́да** күҙ буяу өсөн; **на вид**; **по ви́ду**; **с ви́ду** ҡарар күҙгә, тышҡы күренеше менән; **под ви́дом** *кого* тигән булып, тигән һылтау менән, -ға/-гә һалынып; **вида́ть ви́ды** *см.* **вида́ть** II; **де́лать вид** һалышыу (һалыныу); **име́ть ви́ды** *на кого-что* иҫәп тотоу, ниәт тотоу; **не пода́ть (не показа́ть) ви́ду** сер бирмәү, белгертмәү; **быть на виду́** күҙ алдында булыу, иғтибар үҙәгендә булыу; **у всех на виду́** бөтәһенең күҙ алдында булыу; **име́ть в виду́**: 1) күҙ уңында тотоу; 2) иҫәпкә алыу, иғтибар итеү; 3) теләктә булыу, уйҙа булыу; **име́ться в виду́** күҙ алдында тотолоу; **ни под каки́м ви́дом** һис нисек, һис бер хәлдә лә, ни генә булғанда ла; **ста́вить на вид** *кому* иҫкәртеү, шелтә биреү; **теря́ть из ви́ду** күҙ уңынан сығарыу; **упусти́ть (вы́пустить) из ви́ду** онотоу, күҙ уңынан ысҡындырыу

**ВИД II** *м* **1.** төр, тармаҡ; **все ви́ды ору́жия** ҡоралдың бөтә төрҙәре; **ви́ды живо́тных** хайуандар төрө **2.** *лингв.* төр; **ви́ды глаго́ла** ҡылым төрҙәре

**ВИ́ДАННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **вида́ть** I ♦ **ви́данное ли э́то де́ло** күрелгән эшме ни был

**ВИДА́ТЬ I** *несов. см.* **ви́деть** ♦ **глаза́ б мои́ не вида́ли** *кого-чего* күрмәһәм, яҡшыраҡ булыр ине; **где э́то ви́дано** *с союзом “чтоб” или с неопр.* был ни тигән эш, булған хәл түгел был (*ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә*)

**ВИДА́ТЬ II** *разг.* **1.** *в знач. сказ., безл.* күреп булыу, күренеү; **ничего́ не вида́ть** бер нәмә лә күренмәй; **отсю́да хорошо́ вида́ть** бынан яҡшы күренә **2.** *в знач. вводн. сл.* күрәһең, ахыры, моғайын; **он, вида́ть, весёлый челове́к** ул, күрәһең, күңелле кеше ♦ **в глаза́ не вида́ть** *кого* бөтөнләй күренмәү; **вида́ть ви́ды** күпте күреү; **от земли́ не вида́ть** бик бәләкәй кәүҙәле, бот буйындай; **(ни) зги не вида́ть** ҡараңғы, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ (күренмәҫлек)

**ВИДА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **ви́деться** 3

**ВИ́ДЕНИЕ** *с* күреү, күреү һәләте; **отчётливое ви́дение** аныҡ күреү; **ви́дение на расстоя́нии** алыҫтан күреү һәләте

**ВИДЕ́НИЕ** *с* **1.** (*призрак, привидение*) шәүлә, өрәк; **пе́ред ним не виде́ние, а челове́к** уның алдында өрәк түгел, ә кеше **2.** (*сновидение*) төш күреү; **сла́дкие виде́ния** татлы төштәр **3.** (*образ, воображаемый предмет*) кәүҙәләнеш, күҙ алдына килгән нәмә; **виде́ния про́шлого** боронғоноң кәүҙәләнеше

**ВИ́ДЕТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* күреү; **хорошо́ ви́деть** яҡшы күреү; **я ви́дел мо́ре** мин диңгеҙ күрҙем **2.** *кого-что* (*встречать*) күреү, осрашыу; **я ви́дел его́ вчера́** мин уны кисә осраттым **3.** *что* (*испытывать*) күреү, кисереү; **мно́го ви́деть в жи́зни** тормошта күпте күреү **4.** *что* (*сознавать, находить*) аңлау, һиҙеү, күреү, белеү; **ви́деть свою́ оши́бку** үҙеңдең хатаңды күреү; **ви́деть, с кем име́ешь де́ло** кем менән эш иткәнеңде белеү; **ви́деть необходи́мость** кәрәклектә аңлау **5.** *кого-что* (*считать, принимать*) тип уйлау, һанау, иҫәпләү, табыу; **не ви́жу в э́том ничего́ осо́бенного** бында әллә ни тапмайым; **ви́деть себя́ взро́слым** үҙеңде олоға һанау; **ви́деть меня́ де́вочкой** мине ҡыҙыҡай тип һанау ♦ **ви́дишь (ви́дите)**; **ви́дишь ли (ви́дите ли)** *в знач. вводн. сл.* күрәһеңме (күрәһегеҙме); беләһеңме (беләһегеҙме); **ви́деть на два арши́на под землёй (в зе́млю)** ете ҡат ер аҫтындағын күреү; **ви́деть наскво́зь** *кого* үтәнән-үтә күреү, яҡшы белеү; **ви́деть не мо́гу (не мо́жет)** күрә алмайым, күргем дә килмәй; **как ви́дите** *в знач. вводн. сл.* күреүегеҙсә, күрәһегеҙ; **не ви́деть све́та (во́льного)** көн күрмәү (*тынғыһыҙлыҡ йәки хәсрәт кисереү хаҡында*); **рад ви́деть (вас)** (һеҙҙе) күреүемә шатмын (*сәләмләү һүҙе*); **спать и (во сне) ви́деть** нимәнелер бик ныҡ теләү; **то́лько и ви́дели** *кого* ҡойроғо ғына күренеп ҡалды

**ВИ́ДЕТЬСЯ** *несов.* **1.** *кому-чему* и *без доп.* (*восприниматься зрением*) күренеү; **ко́е-где́ ви́дятся кусты́** унда-бында ҡыуаҡлыҡтар күренә **2.** *кому-чему* (*мысленно представляться, грезиться*) күренеү, һиҙелеү, төшкә кереү; **мне ви́делся стра́шный сон** миңә ҡурҡыныс төш күренде **3.** *с кем* и *без доп.* (*встречаться*) күрешеү, осрашыу; **ви́деться с това́рищами** иптәштәр менән осрашыу; **мы ви́димся ча́сто** беҙ йыш күрешәбеҙ ♦ **как ви́дится** *в знач. вводн. сл.*; *прост.* күрәһең, булһа кәрәк, ихтимал, моғайын

**ВИ́ДИМО** *нареч.* **1.** *уст.* (күҙгә) күренеп, беленеп, асыҡтан-асыҡ; **её жизнь ви́димо га́сла** уның тормошо күҙгә күренеп һүнде **2.** *в знач. вводн. сл.* күрәһең, ахырыһы, буғай, булһа кәрәк; **он, ви́димо, не зна́ет** ул, күрәһең, белмәй

**ВИ́ДИМО-НЕВИ́ДИМО** *нареч.*; *разг.* иҫәпһеҙ-хисапһыҙ, бик күп, икһеҙ-сикһеҙ; **наро́ду собрало́сь ви́димо-неви́димо** халыҡ бик күп йыйылды

**ВИ́ДИМОСТЬ** *ж* **1.** күренеү, күреү мөмкинлеге, күренеүсәнлек; **хоро́шая ви́димость** яҡшы күренеү; **плоха́я ви́димость** насар күренеү **2.** тыштан ғына (күренгән), һүрәтләнеш, кәүҙәләнеш, тышҡы (ҡиәфәт), күренеш; **э́то то́лько одна́ ви́димость** был тик тыштан ғына күренгән; **созда́ть ви́димость поря́дка** тыштан ғына тәртип күренешен булдырыу ♦ **для ви́димости** *прост.* күрер күҙгә генә, күҙ буяу өсөн; **по**

**(всей) ви́димости** *в знач. вводн. сл.* күрәһең, моғайын

**ВИ́ДИМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ви́деть** **2.** *прил.* күренеп торған, күренә торған, күренеүсән; **ви́димые предме́ты** күренеп торған нәмәләр **3.** *прил.* (*явный, очевидный, заметный*) апасыҡ, асыҡ күренеп торған, күҙгә ташланып (күренеп) торған, билдәле булған; **ви́димая вражда́** күҙгә ташланып торған дошманлыҡ; **ви́димая ра́зница в во́зрасте** күҙгә күренеп торған йәш айырмаһы **4.** *прил.*; *разг.* (*кажущийся*) тышҡы, тышҡы яҡтан күренгән, тойолған, булып күренгән; **ви́димая весёлость** тышҡы күңеллелек ♦ **ви́димое де́ло** *в знач. вводн. сл.*; *прост.*: 1) билдәле; 2) моғайын, ихтимал, булһа кәрәк

**ВИДНЕ́ТЬСЯ** *несов.* күренеү, күренеп тороу; **вдали́ видне́ется го́род** алыҫта ҡала күренә

**ВИ́ДНО 1.** *в знач. сказ.*, *безл.* күренә, күренеп тора; **отсю́да ви́дно всю дере́вню** бынан бөтә ауыл күренә; **ви́дно, что он нездоро́в** уның сәләмәт түгеллеге күренеп тора **2.** *в знач. вводн. сл.*; *разг.* күрәһең, ахыры, буғай; **ви́дно, он уже́ уе́хал** күрәһең, ул киткән **3.** *в знач. вводн. сл.* (*в сочетании с "как"*) күренеүенсә; **как ви́дно, он по́нял** күренеүенсә, ул аңланы ♦ **(ни) зги не ви́дно** ҡараңғы, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ

**ВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күренеп торған; **на ви́дном ме́сте** күренеп торған урында **2.** күренекле, ҙур; **ви́дный челове́к** күренекле кеше; **игра́ть ви́дную роль в жи́зни** тормошта ҙур роль уйнау **3.** танылған, таныҡлы, атаҡлы, мәшһүр; **ви́дный учёный** танылған ғалим **4.** *разг.* күрмәлекле, күркәм, зифа буйлы, матур кәүҙәле; **ви́дный па́рень** күрмәлекле егет

**...ВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һымаҡ", "оҡшаш" мәғәнәһендәге икенсе өлөшө, мәҫ.*, **конусови́дный** конусҡа оҡшаш; **шарови́дный** шар һымаҡ

**ВИДОВО́Й I,** -ая, -ое тәбиғәт күренешен сағылдырған; **видово́й фильм** тәбиғәт күренешен сағылдырған фильм

**ВИДОВО́Й II,** -ая, -ое **1.** *спец.* төр ...ы; **видовы́е при́знаки** төр билгеләре **2.** *лингв.* төр ...ы, төр яғынан; **видовы́е разли́чия глаго́лов** ҡылымдарҙың төр яғынан айырмалыҡтары

**ВИДОИЗМЕНЕ́НИЕ** *с* **1.** үҙгәреш, үҙгәреү; **видоизмене́ние облако́в** болоттарҙың үҙгәреүе **2.** (*разновидность*) төр ...ы, бер төрө, үҙгәртелгән төр; **видоизмене́ния плу́га** һабандың үҙгәртелгән төрҙәре

**ВИДОИЗМЕНИ́ТЬ** *сов. что* үҙгәртеү, төрләндереү; **видоизмени́ть прое́кт** проектты үҙгәртеү

**ВИДОИЗМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* үҙгәреү, төрләнеү

**ВИДОИЗМЕНЯ́ЕМОСТЬ** *ж* үҙгәреүсәнлек, төрләнеүсәнлек

**ВИДОИЗМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **видоизмени́ть**

**ВИДОИЗМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **видоизмени́ться** **2.** *страд. от* **видоизменя́ть**

**ВИДОИСКА́ТЕЛЬ** *м*; *фото.* видоискатель, сағылдырғыс, объект эҙләгес

**ВИДООБРАЗОВА́НИЕ** *с*; *биол.* төрҙәр барлыҡҡа килеү, төрҙәр хасил булыу; **тео́рия видообразова́ния** төрҙәр барлыҡҡа килеү теорияһы

**ВИ́ДЫВАТЬ** *несов.*; *разг.* күргеләү, күргеләп ҡалыу

**ВИ́ЗА** *ж* **1.** виза, рөхсәт (*берәй дәүләткә килеү йәки сығыу өсөн хөкүмәт тарафынан паспортҡа ҡуйыла торған рөхсәт*); **получи́ть ви́зу** виза алыу **2.** виза (*документты контролгә алыу йәки теркәү тураһындағы тамға*); **наложи́ть ви́зу** виза һалыу

**ВИЗАВИ́ 1.** *нареч.* ҡапма-ҡаршы, йөҙгә-йөҙ, ҡара-ҡаршы; **танцева́ть визави́** ҡара-ҡаршы бейеү **2.** *м* и *ж нескл.* ҡаршыла ултырыусы кеше; **мой визави́** минең ҡаршыла ултырыусы кеше

**ВИЗГ** *м* сыйылдау, сырылдау, сәрелдәү, сырсыу тауышы, һыҙғырыу, әсе тауыш; **де́ти по́дняли визг** балалар сыр-сыу килде; **визг пу́ли** пуля һыҙғырыуы

**ВИЗГЛИ́ВОСТЬ** *ж* сыйылдаҡлыҡ, сырылдаҡлыҡ; **визгли́вость го́лоса** тауыштың сырылдаҡлығы

**ВИЗГЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое сыйылдаҡ, сырылдаҡ, сәрелдәк; **визгли́вый го́лос** сырылдаҡ тауыш; **визгли́вый поросёнок** сыйылдаҡ суҫҡа балаһы

**ВИ́ЗГНУТЬ** *сов. см.* **визжа́ть**

**ВИЗГОТНЯ́** *ж*; *прост.* сыйылдау, сырылдау, сәрелдәү; **слы́шалась визготня́** сәрелдәү ишетелде

**ВИЗГУ́Н** *м*; *разг.* сәрелдәк кеше

**ВИЗЖА́НИЕ** *с* сыйылдау, сырылдау, сәрелдәү; **слы́шится визжа́ние** сәрелдәү ишетелә

**ВИЗЖА́ТЬ** *несов.* сыйылдау, сырылдау, сәрелдәү, сыжлау, сыйлау; **соба́ка визжи́т** эт сыйылдай; **поло́зья сане́й визжа́т** сана табандары сыжлай

**ВИЗИ́ГА** *ж* мәйрен, балыҡ һеңере

**ВИЗИ́Р** *м* **1.** *фото. см.* **видоиска́тель** **2.** *воен.* визир (*атыу ҡоралының сәпкә төҙәү ҡулайламаһы*) **3.** *геод.*, *астр.*, *ав.* визир (*визирләү өсөн ҡулланылған прибор, ҡулайлама*)

**ВИЗИ́РОВАНИЕ I** *с см.* **визи́ровать** I

**ВИЗИ́РОВАНИЕ II** *с см.* **визи́ровать** II

**ВИЗИ́РОВАТЬ I** *сов.*, *несов. что* виза ҡуйыу, виза һалыу

**ВИЗИ́РОВАТЬ II** *сов.*, *несов. что* визирлау, тоҫҡау, төҙәү; **визи́ровать каку́ю-либо то́чку** берәй нөктәгә тоҫҡау

**ВИЗИ́РОВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **визи́ровать** I

**ВИЗИ́РОВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **визи́ровать** II

**ВИЗИ́РЬ** *м* вәзир

**ВИЗИ́Т** *м* **1.** визит (*рәсми рәүештә осрашыу өсөн кемгәлер барыу*); **официа́льный визи́т**

рәсми визит **2.** визит (*врачтың ауырыу кеше янына өйгә килеүе*); **визи́т к больно́му** ауырыуға визит яһау ♦ **прийти́ (прие́хать, быть и т.п.) с визи́том** визит менән килеү (*ихтирам йөҙөнән*)

**ВИЗИ́ТКА** *ж* **1.** визитка (*түңәрәк итәкле сюртук*) **2.** *разг.* визитка (*эш ҡағыҙҙары йөрөтә торған бәләкәй сумка*)

**ВИЗИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое визит ...ы; **визи́тное пла́тье** визит күлдәге ♦ **визи́тная ка́рточка** визит карточкаһы (*кешенең фамилияһы, исеме, атаһының исеме, адресы, вазифа, дәрәжәһе яҙылып, танышҡанда тапшырыла торған ҡағыҙ*)

**ВИЗУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *астр.* визуаль, күҙ менән күрерлек; **визуа́льные наблюде́ния** визуаль күҙәтеүҙәр

**ВИ́КА** *ж* кәрешкә (*үлән*)

**ВИ́КИНГ** *м* викинг (*Боронғо Скандинавияның диңгеҙ һуғышсыһы*); **по́двиги ви́кингов** викингыларҙың ҡаһарманлыҡтары

**ВИ́КОВЫЙ,** -ая, -ое кәрешкә; **ви́ковые зёрна** кәрешкә орлоҡтары

**ВИКО́НТ** *м* виконт (*Францияла, Англияла һ.б. ҡайһы бер илдәрҙә граф менән барон араһындағы титул һәм шул титулды йөрөткән кеше*)

**ВИКОНТЕ́ССА** *ж* виконт ҡатыны, виконт ҡыҙы

**ВИКТОРИ́НА** *ж* викторина; **литерату́рная виктори́на** әҙәби викторина; **музыка́льная виктори́на** музыкаль викторина

**ВИКТО́РИЯ** *ж* виктория (**1.** *баҡса еләге* **2.** *томбойоҡтар ғаиләһенә ҡараған ҙур яҫы япраҡлы тропик үҫемлек*)

**ВИ́ЛКА** *ж* **1.** (*столовый прибор*) сәнске **2.** *тех.* вилка, сата; **ште́псельная ви́лка** штепсель сатаһы **3.** *воен.* вилка (*снарядтың бер осраҡта төҫкалған урынға барып етмәүе һәм уны уҙып китеү аралығы*); **взять батаре́ю в ви́лку** батареяны вилкаға алыу **4.** *шахм.* вилка

**ВИ́ЛЛА** *ж* вилла (*ҡала ситендәге бай өй йәки дача*)

**ВИЛО́К** *м*; *разг.* бер баш кәбеҫтә, кәбеҫтә күсәне

**ВИЛООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое һәнәк һымаҡ, һәнәккә оҡшаш; **вилообра́зный язычо́к змеи́** йыландың һәнәк һымаҡ теле

**ВИ́ЛЫ** *только мн.* һәнәк ♦ **ви́лами на (по) воде́ пи́сано** иләнмәгән, һуғылмаған, ҡайным, һиңә бер ыштан, хоҙай ҡулындағы нәмә, боҙға яҙған

**ВИЛЬНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *чем* болғап ҡуйыу, һелтәп ҡуйыу; **вильну́ть хвосто́м** ҡойроҡ болғап ҡуйыу **2.** (*сделать быстрое движение в сторону*) (ситкә) тайшаныу, тайпылыу **3.** *разг.* (*круто повернуть — о реке, дороге*) ҡапыл боролоу

**ВИЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *чем* болғау; **соба́ка виля́ет хвосто́м** эт ҡойроғон болғай **2.** (*двигаться по извилистой линии*) борола-борола атлау (барыу) **3.** (*делать крутые повороты, изгибы*) бормаланып-бормаланып ағыу (*йылға*), бормаланып-бормаланып һуҙылыу (*юл*) **4.** *перен.*, *разг.* (*лукавить*) хәйлә ҡороу, мәкер ҡороу, хәйләләү ♦ **виля́ть хвосто́м** ҡойроҡ болғау

**ВИНА́** *ж* **1.** ғәйеп; **призна́ть свою́ вину́** үҙ ғәйебендә таныу **2.** (*причина*) сәбәп; **вино́й э́тому явля́ется уста́лость** быны̇ң сәбәбе — арығанлыҡ ♦ **по вине́** *чьей кемдеңдер* арҡаһында; **вмени́ть в вину́** ғәйепләү

**ВИНЕГРЕ́Т** *м* **1.** винегрет **2.** *перен.*, *разг.* винегрет, юҡ-бар

**ВИНИ́ТЕЛЬНЫЙ: вини́тельный паде́ж** *грам.* төшөм килеш

**ВИНИ́ТЬ** *несов. кого-что* ғәйепләү, ғәйеп ташлау, ғәйепле һанау; **вини́ть други́х люде́й** башҡа кешеләрҙе ғәйепләү

**ВИНИ́ТЬСЯ** *несов.*; *уст.*, *прост.* үҙ ғәйебен таныу, ғәфү үтенеү

**ВИННОКА́МЕННЫЙ: виннока́менная кислота́** шарап ташы кислотаһы

**ВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое шарап ...ы; **ви́нный заво́д** шарап заводы; **ви́нный за́пах** шарап еҫе ♦ **ви́нный ка́мень**: 1) йөҙөм ташы (*йөҙөм һутының төбөнә ултырған кристалл*); 2) теш өҫтөнә ҡатҡан эзбиз ултырмаһы; **ви́нная кислота́** шарап кислотаһы (*йөҙөм ташы менән ҡатышҡанда барлыҡҡа килгән кислота*); **ви́нный спирт** *хим.* шарап спирты; **ви́нная я́года** шарап емеше, инжир

**ВИНО́** *с* **1.** шарап; **молодо́е вино́** йәш шарап; **бе́лое вино́** аҡ шарап; **кра́сное вино́** ҡыҙыл шарап **2.** *разг.* (*водка*) араҡы

**ВИНОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғәйепле; **счита́ть винова́тым** үҙеңде ғәйепле һанау **2.** (*выражающий сознание своей вины*) ғәйепле төҫ (йөҙ, ҡараш); **винова́тый взгляд** ғәйепле ҡараш ♦ **винова́т(а)** ғәфү итегеҙ

**ВИНО́ВНИК** *м* и **ВИНО́ВНИЦА** *ж* ғәйепле кеше; **вино́вник преступле́ния** енәйәттә ғәйепле кеше ♦ **вино́вник (вино́вница) торжества́** тантананың сәбәпсеһе

**ВИНО́ВНОСТЬ** *ж* ғәйеплелек; **установи́ть вино́вность** ғәйеплелекте билдәләү

**ВИНО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғәйепле; **вино́вные ли́ца** ғәйепле кешеләр; **чу́вствовать себя́ вино́вным** үҙеңде ғәйепле итеп һиҙеү **2.** *в знач. сущ.* **вино́вный** *м* и **вино́вная** *ж* ғәйепле кеше; **вино́вный созна́лся** ғәйепле кеше үҙ ғәйебен таныны

**ВИНОГРА́Д** *м* виноград, йөҙөм (*ҡыуағы һәм емеше*)

**ВИНОГРА́ДАРСКИЙ,** -ая, -ое виноградсылыҡ ...ы, виноградсы ...ы; **виногра́дарская бряга́да** виноградсылыҡ бригадаһы

**ВИНОГРА́ДАРСТВО** *с* **1.** (*разведение винограда*) виноградсылыҡ, йөҙөмсөлөк, виноград (йөҙөм) үҫтереү **2.** (*раздел науки*) виноградсылыҡ (йөҙөм үҫтереү) фәне

**ВИНОГРА́ДАРЬ** *м* виноградсы, виноград (йөҙөм) үҫтереүсе

**ВИНОГРА́ДИНА** *ж*; *разг.* бер бөртөк виноград (йөҙөм)

**ВИНОГРА́ДНИК** *м* виноград (йөҙөм) баҡсаһы

**ВИНОГРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** виноград ...ы, йөҙөм ...ы; **виногра́дная гроздь** виноград тәлгәше; **виногра́дная лоза́** виноград сыбығы **2.** виноград ...ы, виноградтан яһалған; **виногра́дный сок** виноград һуты

**ВИНОДЕ́Л** *м* шарапсы, шарап яһаусы (ҡойоусы)

**ВИНОДЕ́ЛИЕ** *с* шарап яһау (эшләү, ҡойоу, әҙерләү)

**ВИНОДЕ́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое шарап яһау (ҡойоу) ...ы, шарап эшләү ...ы, шарап әҙерләү ...ы; **виноде́льческий совхо́з** шарап әҙерләү совхозы

**ВИНОКУ́Р** *м* араҡы яһаусы (ҡыуыусы)

**ВИНОКУРЕ́НИЕ** *с* араҡы ҡыуыу, спирт ҡыуыу

**ВИНОКУ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое араҡы яһау ...ы, араҡы ҡыуыу ...ы; **виноку́ренный заво́д** араҡы ҡыуыу заводы

**ВИНОТОРГО́ВЕЦ** *м* араҡы (шарап) һатыусы

**ВИНОТОРГО́ВЛЯ** *ж* шарап һатыу

**ВИНОЧЕ́РПИЙ** *м*; *уст.* көрәгәсе, шарап өләшеүсе

**ВИНТ I** *м* **1.** шөрөп, винт; **голо́вка винта́** шөрөп башы **2.** винт (*самолёт һәм судноларҙа*); **гребно́й винт** ишеү винты **3.** *в знач. нареч.* **винто́м** *разг.* бормаланып, спираль рәүешендә; **дым поднима́ется винто́м** төтөн бормаланып күтәрелә

**ВИНТ II** *м* винт (*кәрт уйыны*)

**ВИ́НТИК** *м*; *уменьш. от* **винт** I ваҡ шөрөп ♦ **ви́нтиков (ви́нтика) не хвата́ет (в голове́)** *у кого*; *прост.* аҙыраҡ етешмәй, утыҙ туғыҙлы

**ВИНТИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* шөрөптө бороу, бороп индереү, бороп сығарыу

**ВИНТОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **винторе́зный**

**ВИНТО́ВКА** *ж* винтовка; **малокали́берная винто́вка** бәләкәй калибрлы винтовка

**ВИНТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** винт ...ы, шөрөп ...ы; **винтова́я наре́зка** винт һыры **2.** винтлы; **винтово́й парохо́д** винтлы пароход **3.** (*винтообразный*) бормалы; **винтова́я ле́стница** бормалы баҫҡыс

**ВИНТО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое винтовка ...ы, винтовканан; **винто́вочный патро́н** винтовка патроны; **винто́вочный вы́стрел** винтовканан атыу

**ВИНТОМОТО́РНЫЙ,** -ая, -ое *ав.* винт моторлы, винтлы; **винтомото́рная устано́вка** винтлы ҡоролма, винт моторлы ҡоролма

**ВИНТООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое винт рәүешендәге, бормалы; **винтообра́зная ле́стница** бормалы баҫҡыс

**ВИНТОРЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое винт һыры ҡырыу ...ы, винтҡа һыр һалыу; **винторе́зный стано́к** винт һыры ҡырыу станогы

**ВИНЦО́** *с*; *ласк. от* **вино́**

**ВИНЧЕ́СТЕР** *м* винчестер (*һунар мылтығының бер төрө*)

**ВИНЬЕ́ТКА** *ж* виньетка (*китаптың, бүлектең башында, аҙағында төшөрөлгән биҙәк йәки орнамент*); **орнамента́льная винье́тка** орнамент рәүешендәге виньетка

**ВИО́ЛА** *ж*; *муз.* виола (*ҙур скрипкаға оҡшаған ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ВИОЛОНЧЕЛИ́СТ** *м* и **ВИОЛОНЧЕЛИ́СТКА** *ж* виолончелист, виолончелдә уйнаусы

**ВИОЛОНЧЕ́ЛЬ** *ж*; *муз.* виолончель (*ҙур скрипка рәүешендәге дүрт ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ВИ́РА** *межд.* вира (*йөктө "күтәр!", "өҫкә!" тигән команда*)

**ВИРА́Ж I** *м* **1.** вираж (*самолёттың, автомобилдең һ.б. кәкре һыҙыҡ буйынса хәрәкәте, боролоуы*) **2.** вираж, боролма (*юлдың бер өлөшөнөң йәки спорт юлының эскә табан янтайып боролған урыны*); **круто́й вира́ж** текә боролма

**ВИРА́Ж II** *м*; *фото.* вираж (*фотоларҙы ҡағыҙға төшөргәндә, уларға теләгән төҫтө бирер өсөн ҡулланылған химик иретмә*)

**ВИРТУО́З** *м* **1.** виртуоз, оҫта музыкант **2.** ҙур оҫта (*үҙ эшендә юғары оҫталыҡҡа өлгәшкән кеше тураһында*)

**ВИРТУО́ЗНОСТЬ** *ж* виртуозлыҡ, ҙур оҫталыҡ

**ВИРТУО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое виртуоз ...ы, виртуоздарса, бик оҫта; **виртуо́зная игра́** виртуоз уйнау; **виртуо́зное исполне́ние** виртуоздарса башҡарыу **2.** виртуоз ...ы; **виртуо́зная лётная те́хника** виртуоз осоу техникаһы

**ВИРУЛЕ́НТНОСТЬ** *ж*; *мед.* вирулентлыҡ (*микробтарҙың ауырыу тыуҙырыу һәләте*)

**ВИРУЛЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое вирулент, сир таратыусы; **вируле́нтные микро́бы** сир таратыусы микробтар (вирулент микроб)

**ВИ́РУС** *м* вирус; **ви́рус гри́ппа** грипп вирусы

**ВИ́РУСНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*вызванный вирусами*) вируслы ...ы; **ви́русная боле́знь** вируслы ауырыу **2.** (*содержащий вирусы*) вируслы; **ви́русная эму́льсия** вируслы эмульсия

**ВИРУСО́ЛОГ** *м* вирусолог, вирусология белгесе

**ВИРУСОЛО́ГИЯ** *ж* вирусология (*микробиологияның вирустарҙы өйрәнеү тармағы*)

**ВИ́РШИ** *только мн.* **1.** вирша (*урыҫ һәм украин әҙәбиәтендә XVII—XVIII бб. таралған силлабик шиғыр*) **2.** *ирон.* вирша, шиғыр теҙмәһе (*бик насар шиғыр*)

**ВИС** *м*; *спорт.* вис (*турникта, ҡулсала ҡунегеүҙәр яһағанда гимнастың һауала эленеп тороуы*)

**ВИ́СЕЛИЦА** *ж* дар, дар ағасы

**ВИСЕ́ТЬ** *несов.* **1.** эленеп (аҫылынып) тороу, эленеү; **над столо́м виси́т ла́мпа** өҫтәл өҫтөндә лампа эленеп тора **2.** (*нависать, свисать*) һалынып төшөү, һалынып тороу; **костю́м на нём виси́т** уның костюмы һалынып тора **3.** (*казаться неподвижным при полёте, движении — о птицах, насекомых, о солнце и т.д.*) эленеп тороу, тороу; **со́лнце висе́ло в зени́те** ҡояш төшлөктә тора ине **4.** (*быть прикреплённым к чему-л.*) эленеү, эленеп тороу, ҡағып ҡуйыу; **на стене́ виси́т ка́рта** стенала карта эленеп тора **5.** *над кем-чем* (*нависать*) өҫтә аҫылынып тороу, һалынып тороу; **скала́ виси́т над реко́й** ҡая йылға өҫтөндә аҫылынып тора **6.** *над кем-чем*; *перен.* (*угрожать*) (алда) көтөү, янау; **виси́т опа́сность** ҡурҡыныс янай ♦ **висе́ть в во́здухе** *прост.*: 1) ни булыры билгеһеҙ, билдәһеҙ хәлдә булыу; 2) нигеҙләнмәгән, дәлилһеҙ булыу; **висе́ть на волоске́** ҡыл өҫтөндә тороу; **висе́ть на телефо́не** телефондан оҙаҡ (йыш) һөйләшеү; **висе́ть на ше́е** *у кого* елкәһендә ултырыу, муйынына атланыу

**ВИ́СКИ** *с нескл.* виски (*инглиз араҡыһы*)

**ВИСКО́ЗА** *ж* **1.** вискоза (*целлюлозаны махсус эшкәртеп, яһалма туҡыма алыуҙа ҡулланылған матдә*) **2.** вискоза, яһалма ебәк

**ВИСКО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** вискоза ...ы, вискоза; **виско́зное произво́дство** вискоза етештереү **2.** вискоза ...ы, вискозанан яһалған; **виско́зный шёлк** вискоза ебәк

**ВИСЛОЗА́ДЫЙ,** -ая, -ое осалы, һалынып торған осалы; **вислоза́дая овца́** осалы һарыҡ

**ВИСЛОУ́ХИЙ,** -ая, -ое **1.** һалбыр (һалпы, һалынҡы) ҡолаҡлы; **вислоу́хий щено́к** һалбыр ҡолаҡлы көсөк **2.** *прост.*, *бран.* (*глуповатый, нерасторопный — о человеке*) аңра, аңыш

**ВИ́СМУТ** *м* **1.** висмут (*химик элемент, металл*) **2.** висмут (*шул металл ҡушылмаларынан эшләнгән дарыу*)

**ВИ́СНУТЬ** *несов.*; *разг. см.* **висе́ть** ♦ **ви́снуть на ше́е** *у кого* муйынына аҫылыныу

**ВИСО́К** *м* сикә

**ВИСОКО́СНЫЙ: високо́сный год** кәбисә йылы (*февраль айы 29 көндән килгән йыл*)

**ВИСО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое сикә ...ы; **висо́чная кость** *анат.* сикә һөйәге

**ВИСТ** *м* вист (*кәрт уйыны*)

**ВИСЮ́ЛЬКА** *ж*; *разг.* тағылма биҙәүес, тағылған биҙәүес

**ВИСЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее аҫылма, аҫма, аҫылмалы, аҫмалы, эленмәле, элмәле; **вися́чий мост** аҫылма күпер; **вися́чая ла́мпа** аҫылмалы шәм; **вися́чий замо́к** элмәле йоҙаҡ

**ВИТАЛИ́ЗМ** *м* витализм (*биологияла идеалистик ағым*)

**ВИТАЛИ́СТ** *м* виталист, витализмға эйәреүсе

**ВИТАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое витализм ...ы; **виталисти́ческая тео́рия** витализм теорияһы

**ВИТАМИ́Н** *м* витамин

**ВИТАМИНИЗА́ЦИЯ** *ж* витаминлау; **витаминиза́ция проду́ктов** аҙыҡ витаминлау

**ВИТАМИНИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* витаминлау, витамин ҡушыу; **витаминизи́ровать корма́** мал аҙығын витаминлау

**ВИТАМИНИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* *страд.* *от* **витаминизи́ровать**

**ВИТАМИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** витамин ...ы; **витами́нный заво́д** витамин заводы **2.** витаминлы; **витами́нные корма́** витаминлы мал аҙыҡтары

**ВИТАМИНО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое витаминлы, витаминға бай; **витамино́зные о́вощи** витаминға бай йәшелсәләр

**ВИТА́ТЬ** *несов.* **1.** *уст.* йәшәү, көн итеү, ҡайҙалыр булыу **2.** (*присутствовать, находиться, быть ощутимым где-л.*) булыу, тороу, һиҙелеү; **ды́мка пы́ли вита́ла над го́родом** ҡала өҫтөндә саң томаны торҙо ♦ **вита́ть в облака́х** (**в эмпире́ях**); **вита́ть ме́жду не́бом и землёй** хыял диңгеҙендә йөҙөү

**ВИТИЕВА́ТОСТЬ** *ж* хикмәтлелек, ҡабарынҡылыҡ, бөҙөркәлек

**ВИТИЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое хикмәтле, ҡабарынҡы, бөҙрә; **витиева́тая фра́за** хикмәтле фраза; **витиева́тая речь** бөҙрә телмәр; **витиева́тый по́черк** бөҙрә яҙыу

**ВИТИ́ЙСТВО** *с*; *уст.*, *книжн.* һүҙгә (телгә) оҫталыҡ, сәсәнлек

**ВИТИ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.*; *уст.*, *книжн.* ораторлыҡ итеү, оҫта итеп телмәр тотоу

**ВИТО́Й,** -ая, -ое **1.** үрмә, үрелгән, үреп эшләнгән, ишелгән, ишеп эшләнгән; **вито́й по́яс** үреп эшләнгән билбау **2.** борма, винт рәүешендә; **вита́я ле́стница** борма баҫҡыс

**ВИТО́К** *м* **1.** әйләнеш, әйләнмә, бер уратым, урау; **оди́н вито́к вокру́г Земли́** Ер тирәһендә бер әйләнеш **2.** (*свитое спиралью*) урам, уралма, сорнам; **вито́к про́волоки** тимерсыбыҡ урамы

**ВИТРА́Ж** *м* витраж (*төҫлө быялаларҙан яһалған ишек, тәҙрә биҙәктәре, рәсем*); **витражи́ собо́ра** собор витраждары

**ВИТРИ́НА** *ж* витрина; **музе́йная витри́на** музей витринаһы

**ВИТЬ** *несов.* *что* **1.** ишеү; **вить верёвку** бау ишеү **2.** үреү, яһау, эшләү; **вить вено́к** таж үреү; **вить гнездо́** оя яһау **3.** борғолау; **ры́ба вьёт хвосто́м** балыҡ ҡойроғо менән борғолана ♦ **вить верёвки** *из кого* үҙ яйына йөрөтөү, үҙ йырын йырлатыу, үҙ көйөнә бейетеү

**ВИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** уралып үҫеү, үрелеп үҫеү; **плющ вьётся** үрмәле гөл үрелеп үҫә **2.** (*о волосах*) бөҙрәләнеү **3.** (*извиваться*) бормаланыу; **река́ причу́дливо вьётся по доли́не** йылға үҙән буйлап, матур булып, бормаланып аға **4.** (*извиваясь, подниматься*) өйөрөлөп күтәрелеү; **вьётся пыль** саң өйөрөлөп күтәрелә **5.** (*летать, кружась, порхая*) өйөрөлөп осоу; **жа́воронок вьётся над лу́гом** болон өҫтөндә өйөрөлөп һабан

турғайы оса **6.** (*развеваться*) елберҙәү, елпелдәү; **над ма́чтой вьётся флаг** мачта башында флаг елберҙәй ♦ **ви́ться вьюно́м** нык эҫенеү

**ВИ́ТЮТЕНЬ** и **ВИТЮ́ТЕНЬ** *м см.* **вя́хирь**

**ВИ́ТЯЗЬ** *м*; *уст.* бәһлеүән, баһадир

**ВИХЛЯ́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** алпан-толпан атлау, сайҡалып атлап барыу; **вихля́ть всем те́лом** бөтә кәүҙә менән сайҡалып атлап барыу **2.** *чем* (*двигать из стороны в сторону, покачивать*) (бер яҡтан икенсе яҡҡа) борғолау, уйнаҡлау; **вихля́ть рулём** рулде борғолау

**ВИХЛЯ́ТЬСЯ** *несов.*; *прост.* сайҡалыу, бәүелеү, алпан-толпан килеү

**ВИХО́Р** *м* **1.** маңлай сәсе, маңлай өлтөгө **2.** *мн.* **вихры́**; *разг.* урай

**ВИХРА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* тырпайған сәсле, өлтөк

**ВИХРЕВО́Й,** -ая, -ое өйөрмә ...ы, өйөрмәле; **вихрево́й столб** өйөрмә бағанаһы; **вихрево́й ве́тер** өйөрмә ел; **вихрево́е движе́ние** *физ.* өйөрмәле хәрәкәт

**ВИ́ХРЕМ** *нареч.* бик тиҙ (шәп), өйөрмә (дауыл) кеүек; **ворва́ться ви́хрем** өйөрмә кеүек килеп инеү; **мча́ться ви́хрем** бик тиҙ сабыу

**ВИ́ХРИТЬ** и **ВИХРИ́ТЬ** *несов.* өйөрөү; **ве́тер ви́хрил пыль** ел саңды өйөрҙө

**ВИ́ХРИТЬСЯ** и **ВИХРИ́ТЬСЯ** *несов.* өйөрөлөү, ойоҡһоу

**ВИХРЬ** *м* **1.** ҡойон, өйөрмә; **подня́лся́ вихрь** өйөрмә күтәрелде **2.** *чего*; *перен.* дауыл; **вихрь революцио́нных собы́тий** ихтилал ваҡиғалары дауылы

**ВИ́ЦЕ-...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "урынбаҫар", "ярҙамсы" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **ви́це-губерна́тор** вице-губернатор

**ВИ́ЦЕ-АДМИРА́Л** *м*; *мор.* вице-адмирал

**ВИ́ЦЕ-ПРЕЗИДЕ́НТ** *м* вице-президент, президент урынбаҫары

**ВИ́ШЕНКА** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **ви́шня**

**ВИ́ШЕННИК** *м* **1.** сейә баҡсаһы, сейә ҡыуағы **2.** сейәлек (*ҡырағай*)

**ВИШНЁВКА** *ж* сейә араҡыһы, сейә төнәтмәһе

**ВИШНЁВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сейә ...ы; **вишнёвый сад** сейә баҡсаһы; **вишнёвый лист** сейә япрағы **2.** (*о цвете*) сейә ҡыҙыл, ҡарағусҡыл ҡыҙыл; **вишнёвое пла́тье** сейә ҡыҙыл күлдәк; **вишнёвый ба́рхат** ҡарағусҡыл ҡыҙыл бәрхәт

**ВИ́ШНЯ** *ж* сейә (*емеше һәм ағасы*)

**ВИШЬ** *частица*; *прост.* **1.** (*при указании на что-л.*) бына, ҡара; **вишь больно́й лежи́т** ҡара, ауырыу ята **2.** *в знач. вводн. сл.* күрәһеңме, күрҙеңме, күрәһең бит, күрәһегеҙ бит; **вишь, сло́во дал** күрәһеңме, һүҙ бирҙе **3.** (*употребляется для выражения удивления, неудовольствия обычно в сочетании с "как", "какой", "сколько" и т.п.* ) ҡара һин уны, бына һиңә; **вишь, кака́я па́мять** ҡара һин уны, ниндәй хәтер ♦ **вишь ты** бына нимә, бына нисек, бына ниндәй

**ВКА́ЛЫВАТЬ I** *несов. см.* **вколо́ть**

**ВКА́ЛЫВАТЬ II** *несов.*; *прост.* (*работать*) бик нык эшләү

**ВКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вколо́ться 2.** *страд. от* **вка́лывать** I

**ВКА́ПАТЬ** *сов.*; *прост.* тамыҙыу; **вка́пать в глаза́** күҙгә тамыҙыу

**ВКА́ПЫВАТЬ I** *несов. см.* **вкопа́ть**

**ВКА́ПЫВАТЬ II** *несов. см.* **вка́пать**

**ВКА́ПЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вкопа́ться 2.** *страд. от* **вка́пывать** I

**ВКА́ПЫВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **вка́пывать** II

**ВКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, во что* тәгәрләтеп индереү, тәгәрләтеп (тәгәрәтеп) индереп ҡуйыу; **вкати́ть бо́чку в помеще́ние скла́да** мискәне склад эсенә тәгәрләтеп индереп ҡуйыу **2.** *что* (*наверх*) тәгәрләтеп (тәгәрәтеп) мендереү, тәгәрләтеп мендереп ҡуйыу **3.** *обычно кому*; *прост.* сәпәү, сәпәп ебәреү, һалып ебәреү, берҙе тондороу; **вкати́ть дво́йку** икеле сәпәү; **вкати́ть вы́говор** шелтә сәпәү; **вкати́ть пощёчину** сикәһенә сәпәп ебәреү **4.** *без доп.*; *прост. см.* **вкати́ться**; **тро́йка вкати́ла во двор** тройка ишек алдына сабып килеп инде

**ВКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәрләп (тәгәрәп) килеп инеү; **мяч вкати́лся в воро́та** туп ҡапҡаға тәгәрләп (тәгәрәп) килеп инде **2.** *разг.*, *шутл.* бик тиҙ килеп инеү, йүгереп килеп инеү; **она́ вкати́лась в ко́мнату** ул бүлмәгә йүгереп килеп инде **3.** өҫкә килеп етеү; **волна́ вкати́лась на па́лубу** тулҡын палуба өҫтөнә килеп етте

**ВКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **вкати́ть**

**ВКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкати́ться 2.** *страд. от* **вка́тывать**

**ВКАЧА́ТЬ** *сов. что* һурҙырыу; **вкача́ть нефть в цисте́рну** цистернаға нефть һурҙырыу

**ВКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вкача́ть**

**ВКА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вка́чивать**

**ВКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **вки́нуть**

**ВКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вки́дывать**

**ВКИ́НУТЬ** *сов. что* ырғытып индереү, эсенә ырғытыу; **вки́нуть мяч в се́тку** тупты селтәр эсенә ырғытыу

**ВКЛАД** *м* **1.** *см.* **вложи́ть** 3; **вклад де́нег в сберега́тельный банк** һаҡлыҡ банкыһына аҡса һалыу **2.** (*денежная сумма*) вклад, һалынған аҡса, керем; **сро́чный вклад** сроклы вклад; **бессро́чный вклад** срокһыҙ вклад **3.** *перен.* өлөш (*әҙәбиәткә, фәнгә һ.б.*); **вклад в нау́ку** фәнгә өлөш

**ВКЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **вложи́ть 2.** (*вложенный, добавочный лист*) ҡушымта, бит; **цветна́я вкла́дка** төҫлө ҡушымта

**ВКЛАДНО́Й,** -ая, -ое **1.** аҡса индереү ...ы, аҡса һалыу ...ы; **вкладны́е опера́ции** аҡса индереү операциялары **2.** (*являющийся вкладом*) вклад ...ы; **вкладны́е су́ммы** вклад суммаһы

3. (*являющийся вкладкой*) ҡушымта ...ы; **вкладно́й лист** ҡушымта бит

**ВКЛА́ДЧИК** *м* и **ВКЛА́ДЧИЦА** *ж* вклад яһаусы, аҡса һалыусы

**ВКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **вложи́ть**

**ВКЛА́ДЫШ** *м* **1.** *см.* **вкла́дка** **2.** *тех.* вкладыш (*машина, подшипник детале*)

**ВКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **вкле́ить**

**ВКЛЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкле́иться** **2.** *страд. от* **вкле́ивать**

**ВКЛЕ́ИТЬ** *сов.* **1.** *что* өҫтәп йәбештереү (эсенә), йәбештереп ҡуйыу; **вкле́ить в кни́гу лист** китап эсенә бер бит өҫтәп йәбештереү **2.** *перен., разг.* һүҙ ҡыҫтырыу; **вкле́ить интере́сное сло́во** ҡыҙыҡ һүҙ ҡыҫтырыу

**ВКЛЕ́ИТЬСЯ** *сов.* йәбешеү, елемләнеү

**ВКЛЕ́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **вкле́ить** **2.** йәбештермә, өҫтәлмә бит (*мәҫ., китапҡа*)

**ВКЛЕПА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (эстән) ҡуша синәү **2.** *кого*; *перен., прост.* насар эшкә бутау, насарлыҡҡа тарыҡтырыу

**ВКЛЁПКА** *ж* ҡуша синәү, сүкеп беректереү

**ВКЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **вклепа́ть**

**ВКЛИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **вкли́нить**

**ВКЛИ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкли́ниться** **2.** *страд. от* **вкли́нивать**

**ВКЛИ́НИТЬ** и **ВКЛИНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* шыналау, шыналап индереү; **вкли́нить до́ску в щель** таҡтаны ярыҡҡа шыналап индереү **2.** *перен., разг.* (*вставить в речь*) һүҙ ҡыҫтырыу

**ВКЛИ́НИТЬСЯ** и **ВКЛИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*войти клином*) килеп ҡушылыу (сығыу), һырығыу; **доро́га вкли́нилась в лес** юл урманға килеп ҡушылды **2.** (*вторгнуться*) йырып инеү; **отря́д вкли́нился в укрепле́ния проти́вника** отряд дошман нығытмаларына йырып инде

**ВКЛЮЧА́ТЕЛЬ** *м* включатель, тоташтырғыс

**ВКЛЮЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **включи́ть** **2.** (*охватывать*) (үҙ) эсенә алыу; **воспита́ние включа́ет в себя́ преподава́ние** тәрбиә эше уҡытыуҙы ла үҙ эсенә ала

**ВКЛЮЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **включи́ться** **2.** *страд. от* **включа́ть**

**ВКЛЮЧА́Я** **1.** *деепр. от* **включа́ть** **2.** *предлог с вин. п.* (*в том числе*) шулай уҡ, шуның эсенән, шул иҫәптән; **на собра́ние пришли́ все, включа́я старико́в** йыйылышҡа бөтәһе лә, шул иҫәптән ҡарттар ҙа килде

**ВКЛЮЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **включа́ть, включа́ться**; **включе́ние вопро́са в пове́стку собра́ния** мәсьәләне йыйылыштың көн тәртибенә индереү **2.** *спец.* (*ҡушылған*) сит өлөшсә; **включе́ния алма́за** алмасҡа ҡушылған сит өлөшсәләр

**ВКЛЮЧИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* ҡушып, индереп, эсенә алып, ҡуша, ҡуша һанағанда; **по деся́тое число́ включи́тельно** унын ҡуша һанағанда

**ВКЛЮЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* индереү, теркәү, өҫтәү; **включи́ть но́вый пункт в догово́р** килешеүгә яңы пункт өҫтәү; **включи́ть в футбо́льную кома́нду** футбол командаһына индереү **2.** *что* ҡабыҙыу, тоҡандырыу, эшләтә башлау; **включи́ть электри́чество** электр ҡабыҙыу; **включи́ть мото́р** мотор тоҡандырыу; **включи́ть стано́к** станок(ты) эшләтә башлау **3.** *что* (*подключить*) тоташтырыу; **включи́ли телефо́н** телефон тоташтырҙылар

**ВКЛЮЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡушылыу, ҡатнашыу; **включи́ться в соревнова́ние** ярышҡа ҡушылыу **2.** тоташыу, ҡабыныу, эшләй башлау; **радиоста́нция включи́лась** радиостанция эшләй башланы

**ВКОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вколоти́ть**

**ВКОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вкола́чивать**

**ВКОЛОТИ́ТЬ** *сов. что, во что* **1.** *разг.* һуғып (ҡағып) индереү, ҡағыу; **вколоти́ть в сте́ну гвоздь** стенаға ҡаҙаҡ ҡағыу **2.** *прост.* (*повторяя, заставить усвоить, запомнить*) туҡыу, һеңдереү ♦ **вколоти́ть себе́ в го́лову** *что* мейегә һеңдереү

**ВКОЛО́ТЬ** *сов. что* сәнсеү, ҡаҙау, сәнсеп, ҡаҙап ҡуйыу; **вколо́ть була́вку** төйрәмес ҡаҙап ҡуйыу; **вколо́ть иго́лку в тря́пку** энәне сепрәккә сәнсеү

**ВКОЛО́ТЬСЯ** *сов.* сәнселеү, ҡаҙалыу

**ВКОНЕ́Ц** *нареч.*; *разг.* тамам, бөтөнләй; **он вконе́ц изму́чил меня́ свои́ми вопро́сами** ул мине үҙенең һорауҙары менән тамам йөҙәтте

**ВКОПА́ТЬ** *сов. что* ҡаҙып ултыртыу; **вкопа́ть столб в зе́млю** бағананы ергә ҡаҙып ултыртыу ♦ **как (сло́вно, то́чно) вко́панный** бағана кеүек (ҡатып ҡалыу)

**ВКОПА́ТЬСЯ** *сов.* ҡаҙып (соҡоп) инеү; **вкопа́ться в у́гольный пласт** күмер ҡатламына ҡаҙып инеү

**ВКОРЕНИ́ТЬ** *сов. что* һеңдереү, ғәҙәткә әйләндереү, нығытыу; **вкорени́ть послу́шность с де́тства** бала саҡтан тыңлаусанлыҡ һеңдереү

**ВКОРЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* тамырланыу, ғәҙәткә инеү, ерләнеү; **обы́чай вкорени́лся** йола тамырланған

**ВКОРЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вкорени́ть**

**ВКОРЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкорени́ться** **2.** *страд. от* **вкореня́ть**

**ВКОСЬ** *нареч.* ҡыя, янтыҡ, ҡыялап, ҡыйыш; **смотре́ть вкось** ҡыйыш ҡарау; **сложи́ть плато́к вкось** яулыҡты ҡыялап бөкләү ♦ **вкось и вкривь**; **вкривь и вкось**: 1) төрлө яҡҡа ҡараған, ҡыйыш-мыйыш, тырым-тырағай, салыш-солош; 2) рәт-сиратһыҙ

**ВКРА́ДЧИВОСТЬ** *ж* ярамһаҡлыҡ, йомаҡайлыҡ, ялағайлыҡ

**ВКРА́ДЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ярамһаҡ, йомаҡай, ялағай, юха; **вкра́дчивые мане́ры** ялағай ҡыланыштар **2.** йомшаҡ, тәьҫирле, юха; **вкра́дчивый го́лос** юха тауыш

**ВКРА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **вкра́сться**

**ВКРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **вкрои́ть**

**ВКРА́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **вкра́ивать**

**ВКРА́ПИТЬ** *сов. что* **1.** бөрсөкләү, бөрсөкләндереү, тимгелләү, тимгелләндереү (*берәй төҫкә биҙәк итеп икенсе бер төҫтө өҫтәү*) **2.** *перен.* өҫтәү, ҡушыу, ҡыҫтырыу, урынлаштырыу (киҫәк-киҫәк)

**ВКРА́ПИТЬСЯ** *сов.* (киҫәк-киҫәк) өҫтәлеү, ҡушылыу, килеп ҡыҫылыу, урынлашыу

**ВКРАПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вкра́пить 2.** өҫтәлмә, ҡушылма, бөрсөк, тимгел; **вкрапле́ния зо́лота** алтын бөрсөктәре

**ВКРА́ПЛИВАТЬ** *несов. см.* **вкра́пить**

**ВКРА́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкра́питься 2.** *страд. от* **вкра́пливать**

**ВКРАПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вкра́пить**

**ВКРАПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкра́питься 2.** *страд. от* **вкрапля́ть**

**ВКРА́СТЬСЯ** *сов.* **1.** йәшеренеп (боҫоп) килеп инеү, һиҙҙермәй генә килеп инеү **2.** *перен.* барлыҡҡа килеү, хасил булыу, тыуыу; **в мою́ ду́шу вкра́лись сомне́ния** минең күңелемдә шик тыуыҙы **3.** (*попасть по недосмотру*) китеү, ысҡыныу; **в текст вкра́лись оши́бки** текста хаталар киткән ♦ **вкра́сться в дове́рие (в ми́лость)** хәйлә менән ышаныс ҡаҙаныу

**ВКРА́ТЦЕ** *нареч.* ҡыҫҡаса; **вкра́тце изложи́ть содержа́ние кни́ги** китаптың йөкмәткеһен ҡыҫҡаса һөйләп биреү

**ВКРЕПИ́ТЬ** *сов.* (бер нәмәне икенсеһенә) беркетеү, нығытыу

**ВКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* беркетелеү, нығытылыу

**ВКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вкрепи́ть**

**ВКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкрепи́ться 2.** *страд. от* **вкрепля́ть**

**ВКРИВЬ** *нареч.*; *разг.* (*криво*) кәкре, ҡыйыш, салыш ♦ **вкривь и вкось** *см.* **вкось**

**ВКРОЙ́ТЬ** *сов.* (ҡушып) бесеү, өҫтәү (*кейем теккәндә*)

**ВКРУГ** *нареч.* и *предлог см.* **вокру́г**

**ВКРУГОВУ́Ю** *нареч.* **1.** *разг.* түңәрәк буйлап, түңәрәтеп, ҡулдан-ҡулға, урап; **ча́ша пошла́ вкругову́ю** сеүәтә ҡулдан-ҡулға китте; **он пое́хал вкругову́ю** ул урап китте **2.** *прост.* түңәрәкләгәндә, сама менән; **пшени́ца даст вкругову́ю 65 це́нтнеров с гекта́ра** бойҙай сама менән гектарынан 65 центнер бирәсәк

**ВКРУТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг.* бороп ҡуйыу (индереү); **вкрути́ть ла́мпочку в патро́н** лампочканы патронға бороп ҡуйыу **2.** *кому*; *груб.*, *прост.* алдап ышандырыу

**ВКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бороп ҡуйылыу (индерелеү)

**ВКРУТУ́Ю** *нареч.* ҡаты итеп (*йомортҡа бешерең*); **свари́ть яйцо́ вкруту́ю** йомортҡаны ҡаты итеп бешереү

**ВКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вкрути́ть**

**ВКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вкрути́ться 2.** *страд. от* **вкру́чивать**

**ВКУ́ПЕ** *нареч.*; *уст.* бергәләп, бергә, күмәкләп; **мы все вку́пе приняли́сь за рабо́ту** беҙ бөтәбеҙ ҙә күмәкләп эшкә тотондоҡ

**ВКУС** *м* **1.** тәм, тат; **го́рький вкус** әсе тәм; **о́рганы вку́са** тәм һиҙеү органы; **прия́тный на вкус** тәме күңелгә ятышлы; **про́бовать на вкус** тәмен татыу **2.** зауыҡ, матурлыҡ, йәм хисе, -дан/-дән йәм табыу; **одева́ться со вку́сом** зауыҡ менән кейенеү **3.** яратыу, ҡыҙыҡһыныу, йәм табыу; **вкус к литерату́ре** әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныу **4.** *разг.* (*манера, стиль*) стиль, алым; **та́нец в восто́чном вку́се** көнсығыш стилендәге бейеү ♦ **входи́ть во вкус** оҡшап ҡалыу, тәмен белеп алыу; **на вкус** *чей* күҙлегенән сығып ҡарағанда, күҙлегенән ҡарағанда; **по вку́су (быть, прийти́сь)** оҡшау, күңелгә ятыу

**ВКУСИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** *уст.*, *книжн.* ашау, татып ҡарау **2.** *перен.*, *высок.* (*испытать, изведать*) кисереү, тойоу, һиҙеү, хис итеү, тәмен белеү, татып ҡарау; **вкуси́ть все му́ки** бөтә ғазаптарҙы кисереү

**ВКУ́СНО** *нареч.* **1.** тәмле, татлы **2.** (*со вкусом, аппетитно*) тәмләп, тәмле итеп; **вку́сно пить чай** тәмле итеп сәй эсеү

**ВКУ́СНЫЙ,** -ая, -ое тәмле, татлы; **вку́сная еда́** тәмле ашамлыҡ

**ВКУСОВО́Й,** -ая, -ое тәм ...ы, тәм, тәм һиҙеү ...ы; **вкусовы́е о́рганы** тәм һиҙеү ағзалары; **вкусовы́е ощуще́ния** тәм һиҙеү; **вкусовы́е ка́чества пи́щи** аҙыҡтың тәм сифаты

**ВКУСОВЩИ́НА** *ж*; *разг.* зауыҡсылыҡ; **страда́ть вкусовщи́ной** зауыҡсылыҡ менән интегеү

**ВКУША́ТЬ** *несов. см.* **вкуси́ть**

**ВЛА́ГА** *ж* **1.** шыйыҡлыҡ, һыу; **по́чвенная вла́га** тупраҡ һыуы **2.** еүеш, еүешлек, дым; **за́пах вла́ги** еүеш еҫ

**ВЛАГА́ЛИЩЕ** *с* **1.** *анат.* еңсә, инәлек еңсәһе **2.** *бот.* еңсә

**ВЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **вложи́ть**

**ВЛАДЕ́ЛЕЦ** *м* эйә, хужа, биләүсе; **владе́лица** *ж* хужабикә

**ВЛАДЕ́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое хужа булыу ...ы, биләмә; **владе́льческое пра́во** хужа булыу хоҡуғы; **владе́льческие зе́мли** биләмә ерҙәр

**ВЛАДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **владе́ть 2.** (*недвижимое имущество*) биләмә, биләм, милек; **де́довские владе́ния** олатайҙың биләмәһе; **владе́ния Росси́и** Рәсәй биләмәләре

**ВЛАДЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *кем-чем*; *прям.*, *перен.* эйә булыу, эйә булып тороу, хужа булыу, хужа булып тороу; **владе́ть иму́ществом** мөлкәткә хужа булыу; **владе́ть конём** атҡа эйә булыу; **владе́ть тала́нтом расска́зчика** һөйләү талантына эйә булыу **2.** *кем-чем* (*управлять*) биләү, биләп тороу, ҡулында тотоу; **владе́ть импе́рией** империяны биләп тороу **3.** *перен.* буйһондороп тотоу,

ҡулында тотоу; **владе́ть кла́ссом** класты ҡулда тотоу; **владе́ть людьми́** кешеләрҙе буйһондороп тотоу **4.** *перен.* (*охватывать — о мыслях, чувствах*) биләп (солғап) алыу; **разнообра́зные мы́сли владе́ли им** уны төрлө уйҙар биләп алды **5.** *чем* (*уметь обращаться*) эш итеү, эш итә белеү; **владе́ть ору́жием** ҡорал менән эш итә белеү **6.** (*уметь пользоваться, быть мастером*) белеү, файҙалана белеү, оҫта булыу; **владе́ть ру́сским языко́м** урыҫ телен белеү; **владе́ть да́ром сло́ва** һүҙ оҫтаһы булыу **7.** *чем* йөрөтә алыу, эшләтә алыу, хәрәкәт иттерә алыу; **владе́ть руко́й** ҡулды йөрөтә алыу ♦ **владе́ть перо́м** оҫта яҙа белеү, ҡәләм тибрәтә алыу; **владе́ть собо́й** үҙеңде тота белеү, һалҡын ҡанлы булыу

**ВЛАДЫ́КА** *м* **1.** *высок.* бойороусы, хаким, хакимлыҡ итеүсе **2.** *церк.* владыка

**ВЛАДЫ́ЧЕСТВО** *с*; *высок.* хакимлыҡ, өҫтөнлөк, власть; **влады́чество буржуази́и** буржуазия хакимлығы

**ВЛАДЫ́ЧЕСТВОВАТЬ** *несов.*; *высок.* хакимлыҡ итеү, хөкөм һөрөү

**ВЛАЖНЕ́ТЬ** *несов.* дымланыу, еүешләнеү; **во́здух влажне́ет** һауа дымлана

**ВЛА́ЖНОСТЬ** *ж* дымлылыҡ, еүешлек; **вла́жность во́здуха** һауаның дымлылығы; **вла́жность кли́мата** климат(тың) еүешлеге

**ВЛА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое дымлы, еүеш; **вла́жная земля́** еүеш ер; **вла́жный во́здух** дымлы һауа

**ВЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **вломи́ться**

**ВЛАСОГЛА́В** *м* ҡамсығорт

**ВЛА́СТВОВАТЬ** *несов. над кем-чем* и *без доп.* **1.** (*управлять, править*) хакимлыҡ итеү, идара итеү; **вла́ствовать над страно́й** ил менән идара итеү **2.** *перен.* (*господствовать, повелевать*) өҫтөнлөк итеү, баш булыу; **вла́ствовать ума́ми** аҡыл эйәләре өҫтөнән хакимлыҡ итеү **3.** (*управлять, распоряжаться кем-чем-л.*) буйһондороп тотоу, хөкөм итеү (һөрөү); **вла́ствовать над кла́ссом** синыфты буйһондороп тотоу

**ВЛАСТЕЛИ́Н** *м*; *высок.* хужа, хаким, хакимлыҡ итеүсе, хөкөмдар; **властели́н свое́й судьбы́** үҙ яҙмышының хужаһы

**ВЛАСТИ́ТЕЛЬ** *м*; *уст. см.* **властели́н** ♦ **власти́тель дум** иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеүсе, көслө йоғонто яһаусы

**ВЛА́СТНОСТЬ** *ж* бойороусанлыҡ, ҡаты ҡуллы булыу, бойорорға (ҡушырға) әүәҫ(лек); **вла́стность хара́ктера** бойорорға әүәҫ холоҡ

**ВЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *над кем-чем, в ком-чём* и *с неопр., обычно кратк. ф.* хужа (эйә) булған, баш булған, хоҡуҡлы (булған); **в своём до́ме я вла́стен** үҙ өйөмдә мин хужамын; **мы вла́стны вы́брать свою́ доро́гу** беҙ үҙ юлыбыҙҙы һайларға хоҡуҡлыбыҙ **2.** *перен.* буйһондора алған, баш эйҙерә торған; **вла́стная красота́** баш эйҙерә торған матурлыҡ; **вла́стное чу́вство** буйһондороу тойғоһо **3.** (*склонный повелевать, подчинять себе*) бойороусан, буйһондороусан, хакимлыҡ (өҫтөнлөк) итергә яратыусы; **вла́стный го́лос** бойороусан тауыш; **вла́стный челове́к** хакимлыҡ итергә яратыусы кеше

**ВЛАСТОЛЮ́БЕЦ** *м* хакимлыҡ итергә яратыусы кеше

**ВЛАСТОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое хакимлыҡ (власть) һөйөүсе (яратыусы), власҡа ынтылыусы

**ВЛАСТОЛЮ́БИЕ** *с* власть һөйөү (яратыу), власҡа ынтылыу

**ВЛАСТЬ** *ж* **1.** (*государственное управление*) власть, хакимиәт; **демократи́ческая власть** демократик власть; **прийти́ к вла́сти** власҡа килеү **2.** (*правительство*) власть, хөкүмәт **3.** *мн.* **вла́сти** хөкүмәт етәкселәре, хөкөм эйәләре; **ме́стные вла́сти** урындағы хөкүмәт етәкселәре; **сообщи́ть властя́м** хөкөм эйәләренә хәбәр итеү **4.** (*право распоряжаться*) власть, хоҡуҡ, хаҡ; **власть председа́теля** рәйес хоҡуғы; **власть роди́телей** ата-әсәләр хоҡуғы **5.** *чего* (*могущество, сила*) көс, ҡеүәт, хакимлыҡ, өҫтөнлөк; **власть сло́ва** һүҙ көсө ♦ **ва́ша власть** һеҙҙең ихтыярығыҙҙа, һеҙ нисек теләйһегеҙ; **в мое́й (твое́й, его́ и т.д.) вла́сти** минән (һинән, унан һ.б.) тора; **во вла́сти** или **под вла́стью** *кого-чего* баҫым аҫтында, йоғонтоһо аҫтында; **отда́ться во власть** *кого-чего*; **отда́ться (преда́ться) вла́сти** *кого-чего кемгәлер* буйһоноу, *кемдеңдер* баҫымы аҫтында булыу; **теря́ть власть над собо́й** үҙеңде тота (тыя) алмау

**ВЛАСЯНИ́ЦА** *ж* ҡыл кейем

**ВЛАЧИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* һөйрәтеү, һөйрәтеп алып барыу; **влачи́ть се́ти** ау һөйрәтеү **2.** *перен.* (*в сочетании с сущ. "жизнь", "существование", "век", "дни"*) фәҡирлектә йәшәү, ярлы ғүмер итеү, мохтажлыҡта көн итеү

**ВЛЕ́ВО** *нареч.* (*в левую сторону*) һулға, һул яҡҡа; (*слева*) һулда, һул яҡта; **вле́во от тро́пки** һуҡмаҡтан һул яҡта

**ВЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **влезть**

**ВЛЕЗТЬ** *сов.* **1.** *на что* (үрмәләп) менеү; **влезть на де́рево** ағасҡа үрмәләп менеү **2.** *во что*; *разг.* инеү, инеп (сумыу) китеү, үтеп инеү; **влезть в окно́** тәҙрәнән инеү; **влезть в ва́нну** ваннаға инеү (төшөү) **3.** *перен.* (үтеп) инеү, ышанысҡа инеү; **влезть в дру́жбу** дуҫлыҡҡа инеү **4.** *во что*; *разг.* һыйыу, һыйып бөтөү; **ве́щи вле́зли в чемода́н** әйберҙәр сумаҙанға һыйҙы **5.** *прост.* һыйыу, таман булыу, ярау; **сапоги́ не вле́зли** итектәр һыйманы ♦ **влезть в долги́** бурысҡа батыу; **влезть в ду́шу** *кому*: 1) ышанысҡа инеү; 2) эс-бауырға инеү; **не вле́зешь в** *кого*; *прост.* дөрөҫөн белә алмайһың; **ско́лько вле́зет** *прост.* күпме теләйһең, теләгәнсә

**ВЛЕПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, во что* һылау, һылап йәбештереү, йәбештереү, йәбештереп ҡуйыу **2.** *перен., разг.* ҡундырыу, тондороу, сәпәү; **влепи́ть пощёчину** яңағына тондороу; **влепи́ть вы́го-**

**вор** шелтә сәпәү; **влепи́ть четвёрку по поведе́нию** тәртибенә дүртле сәпәү

**ВЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **влепи́ть**

**ВЛЁТ** *м см.* **влете́ть** — **влета́ть**

**ВЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **влете́ть**

**ВЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *во что* осоп (килеп) инеү; **пчела́ влете́ла в окно́** бал ҡорто тәҙрәнән осоп килеп инде **2.** *перен., разг.* (*вбежать*) атылып килеп инеү, йүгереп килеп инеү **3.** *кому безл.*; *разг.* эләгеү; **влете́ло за опозда́ние** һуңлаған өсөн эләкте ♦ **влете́ть в копе́ечку** ҡиммәткә төшөү; **влете́ть бо́мбой**; **влете́ть как бо́мба** атылып килеп инеү

**ВЛЕЧЕ́НИЕ** *с* һәүәҫлек, ынтылыш, мәйел, теләк; **влече́ние души́** күңел ынтылышы ♦ **серде́чное влече́ние** мөхәббәт, ғишыҡ уты

**ВЛЕЧЬ** *несов.* (*тащить*) һөйрәү, тартыу; **экскава́тор влёк ка́менную глы́бу** экскаватор ҙур таш киҫәген һөйрәне **2.** *кого* (күңел) тартыу, йәлеп итеү, ылыҡтырыу, ҡыҙыҡһындырыу; **его́ влечёт к иску́сству** уны сәнғәт ҡыҙыҡһындыра; **меня́ влечёт в родны́е места́** күңелем тыуған яҡтарға тартыла ♦ **влечь за собо́й** *что* сәбәп булыу, алып барыу, килтереү

**ВЛИВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **влива́ть 2.** дарыу ебәреү (*ҡан тамырына йәки тире аҫтына*); **внутриве́нное влива́ние** ҡан тамырына дарыу ебәреү; **влива́ние глюко́зы** глюкоза ебәреү

**ВЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **влить**

**ВЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вли́ться 2.** *страд. от* **влива́ть**

**ВЛИ́ПНУТЬ** *сов. во что* **1.** йәбешеү, йәбешеп эләгеү; **му́ха вли́пла в кле́йкую бума́гу** себен елемле ҡағыҙға йәбешкән **2.** *перен., прост.* уңайһыҙ хәлгә ҡалыу, барып эләгеү, килеп ҡабыу; **а он в како́е де́ло влип** ул ниндәй хәлгә ҡалды

**ВЛИТЬ** *сов. что* **1.** *во что* эсенә ҡойоу, ағыҙыу, һалыу; **влить лека́рство в стака́н** дарыуҙы стаканға һалыу **2.** *в кого-что*; *перен.* өҫтәү, индереү, тыуҙырыу; **э́то вли́ло в него́ бо́дрость** был уға дәрт өҫтәне **3.** *во что*; *перен.* өҫтәү, ҡушыу; **влить отря́д в диви́зию** отрядты дивизияға ҡушыу

**ВЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (ағып) инеү, төшөү; **вода́ влила́сь в кана́ву** һыу канауға ағып төштө **2.** *перен.* тыуыу, үтеп инеү, инеп урынлашыу; **в ме́ня влила́сь уве́ренность** миндә ышаныс тыуҙы; **в се́рдце влила́сь тоска́** йөрәккә һағыш инеп урынлашты **3.** *перен.* өҫтәлеү, ҡушылыу; **в наш коллекти́в влили́сь све́жие си́лы** беҙҙең коллективҡа яңы көстәр өҫтәлде

**ВЛИЯ́НИЕ** *с* **1.** тәьҫир, йоғонто, шауҡым; **благотво́рное влия́ние** ыңғай тәьҫир; **оказа́ть влия́ние** тәьҫир итеү; **находи́ться под влия́нием** йоғонто аҫтында булыу; **влия́ние со́лнечных луче́й на челове́ческий органи́зм** ҡояш нурҙарының кеше организмына тәьҫире **2.** абруй, авторитет; **челове́к с влия́нием** абруйлы кеше; **по́льзоваться влия́нием** абруй менән файҙаланыу

**ВЛИЯ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое абруйлы, авторитетлы, йоғонто яһай алырлыҡ, тәьҫир итерлек; **влия́тельный челове́к** абруйлы (йоғонто яһай алырлыҡ) кеше

**ВЛИЯ́ТЬ** *несов. на кого-что* йоғонто яһау, тәьҫир итеү, шауҡымы тейеү; **влия́ть отрица́тельно** кире йоғонто яһау; **влия́ть на окружа́ющих** әйләнә-тирәләгеләргә тәьҫир итеү

**ВЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вложи́ть 2.** ҡушып һалынған әйбер (*хатҡа, пакетҡа һ.б.*); **письмо́ с вложе́нием** ҡушып һалынған әйбере булған хат **3.** (аҡса) һалыу, (капитал) һалыу; **капита́льные вложе́ния** капитал һалыуҙар

**ВЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (эсенә) һалыу, тығыу, (эсенә) һалып (тығып) ҡуйыу; **вложи́ть письмо́ в конве́рт** хатты конверт эсенә һалыу **2.** *перен.* һалыу, биреү, бағышлау; **вложи́ть все си́лы** бөтә көстө биреү **3.** (*деньги, капитал*) һалыу, керетеү, тотоу; **вложи́ть капита́л** капитал һалыу ♦ **вложи́ть ду́шу** *во что* күңел биреү, ысын күңелдән тотоноу

**ВЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* ватып-емереп (баҫып) килеп инеү, көсләшеп инеү; **вломи́ться в чужо́й дом** кеше өйөнә баҫып килеп инеү

**ВЛЮБИ́ТЬ** *сов. кого* үҙеңде яраттырыу, һөйҙөрөү, ғашиҡ иттереү (*үҙеңә*)

**ВЛЮБИ́ТЬСЯ** *сов. в кого* ғашиҡ булыу, һөйөү; **влюби́ться в де́вушку** ҡыҙға ғашиҡ булыу

**ВЛЮБЛЁННОСТЬ** *ж* ғашиҡлыҡ, һөйөү тойғоһо; **влюблённость в жизнь** тормошҡа ғашиҡлыҡ

**ВЛЮБЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғашиҡ, ғашиҡ булған; **влюблённый ю́ноша** ғашиҡ егет **2.** *в знач. сущ.* **влюблённый** *м* и **влюблённая** *ж* ғашиҡ **3.** (*увлечённый чем-л.*) бирелгән, мауыҡҡан; **он влюблён в свою́ рабо́ту** ул үҙ эшенә бирелгән **4.** ғашиҡтарса, һөйөү тулы; **влюблённый взгляд** һөйөү тулы ҡараш

**ВЛЮБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **влюби́ть**

**ВЛЮБЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **влюби́ться**

**ВЛЮ́БЧИВОСТЬ** *ж* тиҙ (йыш) ғашиҡ булыу

**ВЛЮ́БЧИВЫЙ,** -ая, -ое тиҙ (йыш) ғашиҡ булған, тиҙ ғашиҡ булыусан; **влю́бчивый па́рень** тиҙ генә ғашиҡ булған егет

**ВЛЯ́ПАТЬСЯ** *сов.* **1.** *прост.* барып инеү (төшөү), килеп төшөү (инеү); **вля́паться в грязь** бысраҡҡа барып инеү **2.** *груб., прост.* тарығыу, юлығыу, эләгеү (*күңелһеҙ хәлгә, бәләгә*); **вля́паться в исто́рию** ваҡиғаға тарығыу

**ВМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что, во что* ҡуша (эскә ҡалдырып) һылау; **вма́зать кирпи́ч в сте́ну** кирбесте стенаға ҡуша һылау **2.** *кому*; *прост.* тондороу, сәпәү

**ВМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **вма́зать**

**ВМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **вмота́ть**

**ВМЕНИ́ТЬ** *сов. кому-чему, во что*; *офиц.-дел.* һанау, иҫәпләү, табыу; **вмени́ть в заслу́гу** күрһәткән хеҙмәттәрен иҫәпләү; **вмени́ть в вину́** *кому* ғәйепле тип һанау, ғәйепле тип табыу ♦ **вмени́ть в обя́занность** йөкмәтеү, вазифаһы итеү

**ВМЕНЯ́ЕМОСТЬ** *ж* иҫе-аҡылы теүәллек; **эксперти́за доказа́ла вменя́емость подсуди́мого** экспертиза ғәйепләнеүсенең иҫе-аҡылы теүәллеген раҫланы

**ВМЕНЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое иҫе-аҡылы теүәл, аҡылы камил; **призна́ть вменя́емым** иҫе-аҡылы теүәл тип табыу

**ВМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вмени́ть**

**ВМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **вмёрзнуть**

**ВМЁРЗНУТЬ** *сов.* ҡуша туңыу, туңып ҡалыу; **вмёрзнуть в лёд** боҙға ҡуша туңыу

**ВМЕСИ́ТЬ** *сов. что* ҡушып баҫыу, ҡуша иҙеү; **вмеси́ть в те́сто изю́м** ҡамырға йөҙөм ҡушып баҫыу

**ВМЕ́СТЕ** *нареч.* **1.** (*совместно*) бергә, бергәләп, берлектә; **жить вме́сте** бергә йәшәү **2.** (*одновременно*) бер үк ваҡытта, шул уҡ ваҡытта ♦ **вме́сте с тем** шуның менән бергә

**ВМЕСТИ́ЛИЩЕ** *с* урын, һауыт (*берәй нәмәне урынлаштырыу, һалыу өсөн*); **нефтяны́е вмести́лища** нефть һауыттары

**ВМЕСТИ́МОСТЬ** *ж* һыйҙырыш(лыҡ); **вмести́мость цисте́рны** цистернаның һыйҙырышлығы

**ВМЕСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыйҙырышлы, күп һыйҙырышлы, ҙур, иркен, киң; **вмести́тельный зал** иркен зал

**ВМЕСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һыйҙырыу, һыйҙырып бөтөү; **зал не вмести́л всех слу́шателей** зал бөтә тыңлаусыларҙы һыйҙырып бөтә алманы **2.** *что* урынлаштырыу; **вмести́ть все кни́ги в шкаф** бөтә китаптарҙы шкафҡа урынлаштырыу

**ВМЕСТИ́ТЬСЯ** *сов.* һыйыу, һыйып бөтөү, урынлашыу; **мы все вмести́мся в э́той ко́мнате** беҙ барыбыҙ ҙа ошо бүлмәгә һыйырбыҙ

**ВМЕ́СТО** *предлог с род. п.* урынына; **взять одну́ кни́гу вме́сто друго́й** бер китап урынына икенсеһен алыу

**ВМЕТА́ТЬ** *сов. что* типсеү, типсеп сығыу (ҡуйыу); **вмета́ть рука́в** еңдәрҙе типсеп сығыу

**ВМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **вмета́ть**

**ВМЕША́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** ҡыҫылыш, ҡыҫылыу, тығылыу, ҡатышыу, ҡатнашыу; **вооружённое вмеша́тельство** ҡоралы ҡыҫылыш **2.** ҡатнашлыҡ, ҡатнашыу; **хирурги́ческое вмеша́тельство** хирургия ҡатнашлығы (*хирургик операция яһау*)

**ВМЕША́ТЬ** *сов.* **1.** *что, во что* ҡатыштырыу, өҫтәп ҡатыштырыу, аралаштырыу, ҡушып аралаштырыу **2.** *кого, во что*; *перен., разг.* ҡатнаштырыу, бутау, тығыу; **вмеша́ть в спле́тню** ғәйбәткә бутау

**ВМЕША́ТЬСЯ** *сов. во что* **1.** ҡушылыу, инеп китеү; **вмеша́ться в толпу́** төркөмгә ҡушылыу **2.** тығылыу, ҡыҫылыу, ҡатнашыу; **вмеша́ться в разгово́р** һөйләшеүгә ҡатнашыу; **вмеша́ться в чужи́е дела́** кеше эшенә тығылыу

**ВМЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **вмеша́ть**

**ВМЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **вмеси́ть**

**ВМЕ́ШИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вмеша́ться 2.** *страд. от* **вме́шивать** I

**ВМЕ́ШИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **вме́шивать** II

**ВМЕЩА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **вмести́ть 2.** һыйҙыра алыу, һыйҙырыу, һыйымы (һыйҙырышлы) булыу; **бассе́йн вмеща́ет ты́сячу кубоме́тров воды́** бассейн мең кубометр һыу һыйҙыра

**ВМЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вмести́ться 2.** *страд. от* **вмеща́ть** 2

**ВМИГ** *нареч.* күҙ асып йомғансы, бик тиҙ, шунда уҡ; **вмиг разойти́сь** күҙ асып йомғансы таралышып бөтөү

**ВМИНА́ТЬ** *несов. см.* **вмять**

**ВМОНТИ́РОВАТЬ** *сов. что*; *спец.* монтажлау, монтажлап ҡуйыу

**ВМОТА́ТЬ** *сов. что* ҡушып урау

**ВМУРОВА́ТЬ** *сов. что* ҡуша һылап ҡуйыу, беркетеп ҡуйыу; **вмурова́ть котёл** ҡаҙанды ҡуша һылап, беркетеп ҡуйыу

**ВМЯ́ТИНА** *ж* йәнселгән (уйылған) урын

**ВМЯТЬ** *сов. что* **1.** иҙеп (ергә) һеңдереү, (ергә) ҡуша иҙеү **2.** йәнсеү, йәнселдереү

**ВНАЁМ** и **ВНАЙМЫ́** *нареч.* хаҡ түләтеп файҙаланырға (биреү, алыу); **сдава́ть ко́мнату внаём** бүлмәне хаҡ түләтеп файҙаланырға биреп тороу

**ВНАКИ́ДКУ** *нареч.* иңбашҡа (яурынға) һалып (*киймәйенсә*); **носи́ть ку́ртку внаки́дку** куртканы иңбашҡа һалып йөрөү

**ВНАКЛА́ДКУ: пить внакла́дку (чай, ко́фе и т.п.)** шәкәр һалып эсеү (сәйҙе, ҡәһүәне һ.б.)

**ВНАЧА́ЛЕ** *нареч.* тәүҙә, башта, тәүге осорҙа; **внача́ле бы́ло тру́дно** башта ҡыйын булды

**ВНЕ** *предлог с род. п.* **1.** тышта, ситтә; **вне го́рода** ҡаланан ситтә; **стоя́ть вне кру́га** түңәрәктән тышта тороу

**2.** -һыҙ/-һеҙ, -дан/-дән тыш; **вне ко́нкурса** конкурсһыҙ; **вне пла́на** пландан тыш ♦ **вне вре́мени и простра́нства** ысынбарлыҡты иҫәпкә алмайынса; **вне зако́на** закондан (ҡанундан) тыш; **вне себя́** ныҡ тулҡынланып, үҙен-үҙе иҫләмәйенсә; **вне (вся́кого) сомне́ния** һис шикһеҙ, бер һүҙһеҙ, икеләнмәйенсә

**ВНЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "тыш" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **внебюдже́тный** бюджеттан тыш; **внесме́тный** сметанан тыш

**ВНЕБРА́ЧНЫЙ: внебра́чные де́ти** никахһыҙ тыуған балалар; **внебра́чный ребёнок** тыума

**ВНЕВОЙСКОВО́Й: внево́йскова́я подгото́вка** армияға алмайынса хәрби хеҙмәткә әҙерләү

**ВНЕВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* ваҡыт менән сикләнмәгән (билдәләнмәгән)

**ВНЕДРЕ́НИЕ** *с* индереү, ҡабул итеү; **внедре́ние достиже́ний нау́ки в произво́дство** фән ҡаҙаныштарын производствоға индереү

**ВНЕДРИ́ТЬ** *сов. что* индереү, ҡулланыу, йәйелдереү; **внедри́ть в произво́дство** производствоға индереү; **внедри́ть но́вые ме́тоды** яңы ысулдар индереү

**ВНЕДРИ́ТЬСЯ** *сов.* инеү, ҡулланыу, йәйелеү; **в се́льском хозя́йстве внедря́ется но́вая те́хника** ауыл хужалығында яңы техника ҡулланыла

**ВНЕДРЯ́ТЬ** *несов. см.* **внедри́ть**

**ВНЕДРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **внедри́ться** **2.** *страд. от* **внедря́ть**

**ВНЕЗА́ПНО** *нареч.* көтмәгәндә, ҡапыл, кинәт; **появи́ться внеза́пно** ҡапыл килеп сығыу

**ВНЕЗА́ПНОСТЬ** *ж* **1.** көтөлмәгәнлек, ҡапыл, кинәт; **внеза́пность ата́ки** һөжүмдең көтөлмәгәнлеге **2.** *разг.* көтөлмәгән хәл (ваҡиға); **жизнь полна́ внеза́пностей** тормош көтөлмәгән ваҡиғаларға бай

**ВНЕЗА́ПНЫЙ,** -ая, -ое көтөлмәгән, ҡапыл (кинәт) булған; **внеза́пный отъе́зд** көтөлмәгән китеү

**ВНЕЗЕМНО́Й,** -ая, -ое Ерҙән ситтәге (ситтә булған), Ерҙән тыш; **внеземны́е цивилиза́ции** Ерҙән ситтәге цивилизациялар

**ВНЕКЛА́ССНЫЙ,** -ая, -ое кластан (синыфтан) тыш; **внекла́ссное чте́ние** синыфтан тыш уҡыу; **внекла́ссные мероприя́тия** кластан тыш саралар

**ВНЕКЛА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое синфилыҡтан тыш, синыфтан тыш; **внекла́ссовое о́бщество** синфилыҡтан тыш йәмғиәт

**ВНЕКО́НКУРСНЫЙ,** -ая, -ое конкурстан тыш (булған), конкурсһыҙ; **внеко́нкурсное зачисле́ние** конкурстан тыш ҡабул итеү

**ВНЕМА́ТОЧНЫЙ: внема́точная бере́менность** *мед.* аналыҡ тышында булған йөклөлөк

**ВНЕОЧЕРЕДНО́Й,** -ая, -ое сираттан тыш; **внеочередно́е совеща́ние** сираттан тыш кәңәшмә

**ВНЕПЛА́НОВЫЙ,** -ая, -ое пландан тыш; **внепла́новое зада́ние** пландан тыш йөкләмә

**ВНЕСЕ́НИЕ** *с* индереү; **внесе́ние попра́вок в текст** текстка төҙәтмәләр индереү

**ВНЕСЛУЖЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое хеҙмәттән тыш (башҡа); **во внеслуже́бное вре́мя** хеҙмәттән башҡа ваҡытта

**ВНЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* индереү, индереп ҡуйыу; **внести́ ве́щи в ко́мнату** әйберҙәрҙе бүлмәгә индереү **2.** *что* индереү, теркәү, яҙып ҡуйыу; **внести́ фами́лию в спи́сок** фамилияны исемлеккә теркәү; **внести́ попра́вки в текст** текстка төҙәтмәләр индереү **3.** *что* (аҡса) индереү, түләү; **внести́ взнос** взнос индереү **4.** *что* килтереп сығарыу, -ып/-еп ебәреү, индереү; **внести́ оживле́ние** йәнләндереп ебәреү; **внести́ раздо́ры** ыҙғыш килтереп сығарыу **5.** *что* өҫтәү, байытыу, индереү; **внести́ в литерату́ру но́вые иде́и** әҙәбиәтте яңы идеялар менән байытыу ♦ **внести́ предложе́ние** тәҡдим индереү; **внести́ я́сность** асыҡлыҡ индереү, асыҡлау

**ВНЕСТИ́СЬ** *сов.*; *разг.* атылып килеп инеү, йүгереп (сабып) килеп инеү; **внести́сь в ко́мнату** бүлмәгә йүгереп килеп инеү

**ВНЕУРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое дәрестән тыш; **внеуро́чные заня́тия** дәрестән тыш уҡыуҙар

**ВНЕШКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мәктәптән тыш; **внешко́льная рабо́та** мәктәптән тыш эш

**ВНЕ́ШНЕ** *нареч.* тыштан (тышҡы яҡтан) ҡарағанда; **вне́шне каза́ться споко́йным** тыштан ҡарағанда тыныс күренеү

**ВНЕШНЕПОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тышҡы сәйәси, тышҡы сәйәсәткә ҡараған; **внешнеполити́ческий курс** тышҡы сәйәси курс

**ВНЕШНЕТОРГО́ВЫЙ,** -ая, -ое тышҡы сауҙа; **внешнеторго́вые свя́зи** тышҡы сауҙа бәйләнештәре

**ВНЕ́ШНИЙ,** -яя, -ее **1.** *в разн. знач.* тышҡы, тирә-яҡ; **вне́шний вид** тышҡы күренеш; **вне́шняя поли́тика** тышҡы сәйәсәт; **вне́шняя среда́** тирә-яҡтағы мөхит; **вне́шняя торго́вля** тышҡы сауҙа; **вне́шний лоск** тышҡы ялтырауыҡ; **вне́шний ры́нок** тышҡы баҙар; **вне́шние враги́** тышҡы дошмандар **2.** тышҡы, тыш яҡтан; **вне́шние измене́ния** тыш яҡтан үҙгәрештәр ♦ **вне́шний у́гол** *мат.* ҡабарынҡы мөйөш

**ВНЕ́ШНОСТЬ** *ж* тышҡы күренеш (ҡиәфәт, килеш-килбәт); **суди́ть по вне́шности** тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап фекер йөрөтөү

**ВНЕШТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое штаттан тыш, штатта тормаған (булмаған); **внешта́тные сотру́дники** штатта тормаған хеҙмәткәрҙәр

**ВНИЗ** *нареч.*; *в разн. знач.* түбәнгә, аҫҡа, түбәнгә табан; **спуска́ться вниз** түбәнгә төшөү; **загляну́ть вниз** аҫҡа ҡарау; **плыть вниз по тече́нию** һыу ағымы менән түбәнгә табан йөҙөү ♦ **идти́ (кати́ться, спуска́ться и т.п.) вниз** түбәнгә тәгәрәү

**ВНИЗУ́** *нареч.* **1.** түбәндә, аҫта; **он живёт внизу́** ул түбәндә (түбәнге ҡатта) йәшәй **2.** *в знач. предлога с род. п.* аҫтында, аҙағында; **внизу́ до́ма** өй аҫтында; **внизу́ письма́** хат аҙағында

**ВНИКА́ТЬ** *несов. см.* **вни́кнуть**

**ВНИ́КНУТЬ** *сов. во что* аңлау, төшөнөү, төшөнөп алыу; **вни́кнуть во всё** бөтәһенә төшөнөү

**ВНИМА́НИЕ** *с* **1.** иғтибар, дикҡәт, күңел биреү; **слу́шать со внима́нием** дикҡәт менән тыңлау; **сосредото́чить внима́ние** иғтибар туплау; **привлека́ть внима́ние** иғтибар йәлеп итеү **2.** (*забота*) хәстәрлек, илтифат, иғтибар; **окружи́ть внима́нием** хәстәрлек күрһәтеү ♦ **внима́ние!** иғтибар итегеҙ!, тыңлағыҙ!; **внима́нию (слу́шателей, покупа́телей и т.д.)** (тыңлаусылар, һатып

алыусылар һ.б.) иғтибарына; **обрати́ть внима́ние** *кого, на кого-что* иғтибар итеү; **оста́вить без внима́ния** *кого-что* иғтибарһыҙ ҡалдырыу; **приня́ть во внима́ние** *что* иғтибарға алыу; **в це́нтре внима́ния (быть, находи́ться)** иғтибар үҙәгендә (булыу)

**ВНИМА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** иғтибарлылыҡ, иғтибар, диҡҡәтлелек; **прояви́ть внима́тельность** иғтибарлылыҡ күрһәтеү **2.** (*заботливость*) хәстәрлелек, илтифатлылыҡ; **отнести́сь со внима́тельностью** илтифатлылыҡ менән ҡарау

**ВНИМА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иғтибарлы, диҡҡәтле; **внима́тельный наблюда́тель** диҡҡәтле күҙәтеүсе; **внима́тельный учени́к** иғтибарлы уҡыусы **2.** (*заботливый*) хәстәрлекле, илтифатлы; **внима́тельное отноше́ние** хәстәрлекле мөнәсәбәт

**ВНИМА́ТЬ** *несов. см.* **внять**

**ВНИЧЬЮ́** *нареч.* бер яҡтың да отмауы менән, бер яҡ та отмайынса; **зако́нчить па́ртию вничью́** партияны бер яҡтың да отмауы менән тамамлау

**ВНО́ВЕ** *нареч. в знач. сказ.*; *разг.* яңы, яңыса, ят; **ему́ здесь всё вно́ве** уға бында бөтәһе лә яңы

**ВНОВЬ** *нареч.* **1.** яңынан, ҡабаттан, өр-яңынан, тағы ла; **уви́деться вновь** яңынан күрешеү **2.** яңы (ғына), күптән түгел, тәү башлап; **вновь при́бывший** яңы килгән (*кеше*)

**ВНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **внести́**

**ВНУК** *м* ейән, торон; **вну́чка** *ж* ейәнсәр

**ВНУ́ТРЕННЕ** *нареч.* эстән, эсенән, күңелдән; **вну́тренне быть дово́льным** күңелдән үҙең менән ҡәнәғәт булыу

**ВНУ́ТРЕННИЙ,** -яя, -ее *в разн. знач.* эске, эстәге ...ы; **вну́тренний мир** эске донъя; **вну́тренняя связь собы́тий** ваҡиғаларҙың эске бәйләнеше; **вну́тренняя поли́тика** эске сәйәсәт; **вну́тренний ры́нок** эске баҙар; **вну́тренняя ко́мната** (төпкө) бүлмә ♦ **вну́тренние боле́зни** *мед.* эске ауырыуҙар; **вну́тренняя секре́ция** *физиол.* эске секреция

**ВНУ́ТРЕННОСТЬ** *ж* **1.** *чего* эс, эсе, эске яҡ; **вну́тренность до́ма** өйҙөң эсе **2.** *мн.* **вну́тренности** *анат.* эске ағзалар (*эс-ҡарын, үпкә-ауыр һ.б.*)

**ВНУТРИ́** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* эстә; **находи́ться внутри́** эстә булыу **2.** *предлог с род. п.* эсендә; **внутри́ го́рода** ҡала эсендә

**ВНУТРИ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "эсендәге", "эстәге", "эстә", "эске" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **внутригосуда́рственный** дәүләт эсендәге; **внутриа́томный** атом эсендәге; **внутриотраслево́й** тармаҡ эсендәге

**ВНУТРЬ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* эскә; **попа́сть внутрь** эскә эләгеү **2.** *предлог с род. п.* эсенә; **внутрь до́ма** өй эсенә

**ВНУША́ТЬ** *несов. см.* **внуши́ть**

**ВНУШЕ́НИЕ** *с* **1.** ышандырыу, күңелгә уй (ҡурҡыу) һалыу (тыуҙырыу); **лече́ние внуше́нием** ышандырыу менән дауалау; **внуше́ние стра́ха** ҡурҡыу һалыу **2.** өгөт, өгөт-нәсихәт; **де́лать внуше́ние** өгөт-нәсихәт ҡылыу (яһау)

**ВНУШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәьҫирле, тәьҫир итерлек, тәьҫир итә торған; **внуши́тельный вид** тәьҫир итерлек ҡиәфәт **2.** *разг.* (*большой*) ҙур, оло; **внуши́тельная фигу́ра** ҙур фигура

**ВНУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*заставить усвоить*) ышандырыу, күңеленә һалыу, төшөндөрөү, аңлатыу; **внуши́ть оригина́льную мысль** оригиналь фекерҙе күңеленә һалыу **2.** (*возбудить какие-л. чувства*) тыуҙырыу, уятыу, ҡуҙғатыу; **внуши́ть страх** ҡурҡыу уятыу

**ВНЯ́ТНО** *нареч.* асыҡ, аныҡ, асыҡ (аныҡ) итеп; **чита́ть вня́тно** асыҡ итеп уҡыу

**ВНЯ́ТНОСТЬ** *ж* асыҡлыҡ, аныҡлыҡ, аңлайышлылыҡ; **вня́тность ре́чи** телмәрҙең аңлайышлылығы

**ВНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** асыҡ, асыҡ ишетелешле, асыҡ (аныҡ) ишетелгән; **вня́тное чте́ние** асыҡ уҡыу **2.** аныҡ, аңлайышлы; **вня́тное сло́во** аңлайышлы һүҙ

**ВНЯТЬ** *сов. кому-чему* **1.** *уст.* тыңлау, ишетеү **2.** иғтибар (диҡҡәт) итеү; **внять про́сьбе** *чьей-л. кемдеңдер* үтенесенә иғтибар итеү

**ВО...** *приставка см.* **в...**

**ВО́БЛА** *ж* вобла, диңгеҙ сабағы

**ВОБРА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*втянуть, впитать*) эскә алыу, һеңдереү, һурып алыу; **расте́ния вобра́ли всю вла́гу** үҫемлектәр бөтә дымды һурып алған **2.** (*включить в свой состав, обычно в сочет. с "в себя"*) үҙ эсенә алыу, индереү; **движе́ние вобра́ло в себя́ и сторо́нников рефо́рмы** хәрәкәт үҙ эсенә реформа яҡлыларҙы ла алды ♦ **вобра́ть го́лову в пле́чи** ҡулбаштарын күтәреп, эйәкте күкрәккә эйеү

**ВОВЕ́К** и **ВОВЕ́КИ** *нареч.* **1.** һәр ваҡыт, мәңге, ғүмергә; **вове́ки живо́й** мәңге тере **2.** (*при глаголе с отрицанием*) бер ҡасан да, бер ваҡытта ла; **не забу́дется вове́к** бер ҡасан да онотолмаясаҡ

**ВОВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **вовле́чь**

**ВОВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вовле́чься** **2.** *страд. от* **вовлека́ть**

**ВОВЛЕ́ЧЬ** *сов. кого-что, во что* ылыҡтырыу, йәлеп итеү, ҡатнаштырыу; **вовле́чь в рабо́ту** эшкә йәлеп итеү; **вовле́чь в разгово́р** һүҙгә ҡатнаштырыу

**ВОВЛЕ́ЧЬСЯ** *сов. во что* ҡатнашыу; **она́ вовлекла́сь в разгово́р** ул һүҙгә ҡатнашып китте

**ВОВНЕ́** *нареч.* ситтә, тышта, ситендә, тышында

**ВОВНУ́ТРЬ** *нареч.* и *предлог*; *прост. см.* **внутрь**

**ВО́ВРЕМЯ** *нареч.* ваҡытында, бик ваҡытлы; **убра́ть урожа́й во́время** уңышты ваҡытында йыйып алыу

**ВО́ВСЕ** *нареч.*; *разг.* бөтөнләй, һис тә, бер ҙә; **во́все не ну́жно** бөтөнләй (бер ҙә) кәрәкмәй; **во́все не хоте́ть** бөтөнләй теләмәү

**ВОВСЮ́** *нареч.*; *разг.* бар көскә (көсөнә), бик шәп, бик ҡыҙыу; **вовсю́ пусти́ться бежа́ть** бар көскә йүгереп китеү

**ВО-ВТОРЫ́Х** *вводн. сл.* икенсенән; **во-вторы́х, дождь пошёл** икенсенән, ямғыр яуа башланы

**ВОГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, во что* ҡыуып (ҡыуалап) индереү; **вогна́ть коз в сара́й** кәзәләрҙе һарайға ҡыуып индереү **2.** *что, во что*; *разг.* ҡағып индереү, ҡаҙау, сәнсеү; **вогна́ть гвоздь в сте́ну** ҡаҙауҙы стенаға ҡағып индереү **3.** *кого-что*; *перен., разг.* (*привести в какое-л. состояние*) (килтереп) еткереү, төшөрөү; **вогна́ть в слёзы** илар сиккә еткереү ♦ **вогна́ть в гроб** гүргә индереү; **вогна́ть в кра́ску** (йөҙөн) ҡыҙартыу, оялтыу; **вогна́ть в пот** тиргә батырыу (төшөрөү)

**ВО́ГНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вогну́ть** соҡорайған, бөгөлгән, йәмшәйтелгән **2.** *прил.* батынҡы, уйынҡы, уйымлы; **во́гнутое зе́ркало** уйынҡы көҙгө

**ВОГНУ́ТЬ** *сов. что* (эскә табан) йәмшәйтеү (бөгөү), соҡорайтыу; **вогну́ть про́волоку** тимер сыбыҡты бөгөү

**ВОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* бөгөлөү, эскә табан бөгөлөү (батынҡыланыу, батыу)

**...ВО́Д** *м* (*урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең икенсе өлөшө, беренсе киҫәктә аңлашылған тармаҡ белгестәрен атау өсөн ҡулланыла*); **овощево́д** йәшелсәсе; **табаково́д** тәмәке үҫтереү белгесе

**ВОДА́** *ж* **1.** һыу; **грунто́вая вода́** ер аҫты һыуы; **морска́я вода́** диңгеҙ һыуы; **пре́сная вода́** сөсө һыу; **прото́чная вода́** ағын һыу; **роднико́вая вода́** шишмә һыуы; **пить во́ду** һыу эсеү **2.** *обычно с опред.* һыуы, -лы/-ле һыу; **газиро́ванная вода́** газлы һыу; **ро́зовая вода́** роза (еҫле) һыуы **3.** *мн.* **во́ды**; *геол.* минераль һыу сығанағы, шифалы һыу сығанағы; **е́хать на во́ды** шифалы һыу сығанағына барыу **4.** *мн.* **во́ды** *собир.* һыуҙар, һыу ятҡылыҡтары; **во́ды Башкортоста́на** Башҡортостан һыуҙары; **госуда́рственные во́ды** дәүләт һыу ятҡылыҡтары; **территориа́льные во́ды** территориаль һыуҙар **5.** *в знач. нареч.* **водо́й, водо́ю** һыу юлы менән; **доста́вка ле́са водо́й** ағасты һыу юлы менән килтереү ♦ **жива́я вода́** тере һыу; **мёртвая вода́** үле һыу; **седьма́я (деся́тая) вода́ на киселе́** (*о дальних родственниках*) сыбыҡ осо, ете ят; арба күсәрҙәре сәкәшкән; **лить во́ду на ме́льницу** *чью* кеше тирмәненә һыу ҡойоу; **толо́чь во́ду (в сту́пе)**; **носи́ть во́ду решето́м** иләк менән һыу ташыу, бушты бушҡа бушатыу; **воды́ не замути́т** бик йыуаш, баҫалҡы кеше; **вы́йти сухи́м из воды́** һыуҙан ҡоро сығыу; **набра́ть воды́ в рот** ауыҙына һыу ҡабыу, ләммим тип әйтмәү; **водо́й не разли́ть (не разольёшь)** *кого* араларынан ҡыл да (ел дә) үтерлек түгел; **вы́вести на чи́стую во́ду** *кого* фаш итеү; **ти́ше воды́, ни́же травы́** тауыш-тыны юҡ, өнө лә сыҡмай; **мно́го (нема́ло, сто́лько и т.д.) воды́ утекло́** күп һыуҙар аҡты, күп ғүмер (заман) үтеп китте; **пройти́ ого́нь и во́ду (и ме́дные тру́бы)** утһыу кисеү, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыу, күпте күреү; **концы́ в во́ду** эҙһеҙ юғалыу; **в ого́нь и во́ду (гото́в, пойдёт и т.д.)** утҡа-һыуға инергә әҙер булыу; **лови́ть ры́бу в му́тной воде́** болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоу, кеше ҡазаһынан файҙаланып ҡалыу; **как с гу́ся вода́** бер ни түгел, бер ни тормай, бар тип тә белмәү, ыжлап та бирмәй; **как две ка́пли воды́ (похо́ж)** ике тамсы һыу кеүек (оҡшаш); **как ры́ба в воде́ (чу́вствовать себя́)** һыуҙағы балыҡ кеүек (тойоу); **как (бу́дто, сло́вно) в во́ду гляде́л (смотре́л)** үтә күреү, алдан белеп тороу; **как (бу́дто, сло́вно) в во́ду ка́нул** һыуға төшкәндәй юҡ булыу; **как (бу́дто, сло́вно) в во́ду опу́щенный** балтаһы һыуға төшкәндәй, күңелһеҙ, һыуға төшкән тауыҡ кеүек, бойоҡ

**ВОДВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, во что* индереү, индереп (күсереп) урынлаштырыу; **водвори́ть в друго́е жили́ще** бүтән торлаҡҡа күсереп урынлаштырыу **2.** *что*; *перен.* урынлаштырыу, булдырыу; **водвори́ть тишину́ в кла́ссе** класта тынлыҡ урынлаштырыу

**ВОДВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *в чём* инеү, инеп урынлашыу; **водвори́ться в ко́мнате** бүлмәгә инеп урынлашыу **2.** *перен.* урынлашыу; **водвори́лась тишина́** тынлыҡ урынлашты

**ВОДВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **водвори́ть**

**ВОДВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **водвори́ться** **2.** *страд. от* **водворя́ть**

**ВОДЕВИ́ЛЬ** *м* водевиль (*шаян комедия*)

**ВОДЕВИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое водевиль ...ы; **водеви́льные купле́ты** водевиль куплеттары

**ВОДИ́ТЕЛЬ** *м* водитель, йөрөтөүсе, машина йөрөтөүсе; **води́тель трамва́я** трамвай йөрөтөүсе

**ВОДИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое водитель ...ы, йөрөтөүсе(ләр) ...ы; **води́тельское удостовере́ние** йөрөтөүсе (водитель) таныҡлығы

**ВОДИ́ТЕЛЬСТВО** *с*; *уст., высок.* юлбашсылыҡ, етәкселек; **под води́тельством генера́ла** генерал етәкселегендә

**ВОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* йөрөтөү, етәкләп йөрөтөү, алып йөрөү, оҙатып (буйлап) йөрөтөү; **води́ть дете́й на прогу́лку** балаларҙы саф һауала йөрөргә алып сығыу; **води́ть ребёнка за́ руку** баланы етәкләп йөрөтөү; **води́ть экскурса́нтов по го́роду** экскурсанттарҙы ҡала буйлап йөрөтөү **2.** (*идти во главе кого-чего-л.*) алып барыу, етәкселек итеү; **води́ть полки́ в ата́ку** полктарҙы һөжүмгә алып барыу **3.** *что* (*управлять чем-л. движущимся*) йөрөтөү; **води́ть трамва́й** трамвай йөрөтөү **4.** *чем, по чему* йөрөтөү; **води́ть смыч-**

**ко́м по стру́нам** һыҙғыс менән ҡылдар өҫтөнән йөрөтөү **5.** *что* булыу; **води́ть дру́жбу** дуҫ булыу **6.** *что*; *разг.* тотоу, үрсетеү; **води́ть пчёл** бал ҡорто тотоу **7.** (*в детских играх*) уҙаман булыу, уҙаманлыҡ итеү ♦ **води́ть за́ нос** алдап йөрөтөү; **води́ть на по́мочах** ҡулынан тотоп йөрөтөү, үҙаллылыҡ бирмәү; **води́ть хле́б-со́ль** *с кем* дуҫ булышыу, аралашыу

**ВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бар (күп) булыу, йәшәү; **в леса́х во́дятся медве́ди** урманда айыуҙар йәшәй; **у него́ води́лось мно́го книг** уның китаптары күп була торғайны **2.** *с кем*; *разг.* (*дружить*) дуҫлашыу, дуҫ булыу, аралашыу; **он во́дится с рыбака́ми** ул балыҡсылар менән дуҫ **3.** *страд. от* **води́ть** ♦ **как во́дится** *в знач. вводн. сл.* ғәҙәттәгесә, ғәҙәт буйынса

**ВО́ДКА** *ж* араҡы ♦ **кре́пкая во́дка** *хим.* азот кислотаһы; **ца́рская во́дка** *хим.* алтын иреткес (*тоҙ кислотаһы менән азот кислотаһы ҡушымтаһы*)

**ВО́ДНИК** *м* һыу юлы хеҙмәткәре, йылғасы

**ВОДНОЛЫ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое һыу өҫтөндә саңғы шыуыуы ...ы, һыу саңғыһы ...ы; **водноло́жный спорт** һыу саңғыһы спорты

**ВО́ДНОСТЬ** *ж*; *гидр.* һыу күләме (*йылғаларҙа, күлдәрҙә*)

**ВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һыу ...ы; **во́дный тра́нспорт** һыу транспорты; **во́дная эне́ргия** һыу энергияһы; **во́дный путь** һыу юлы **2.** *хим.* һыулы; **во́дные соедине́ния** һыулы ҡушылмалар ♦ **во́дные лы́жи** һыу саңғыһы

**...ВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *урыҫ телендәге һүҙҙәрҙең "һыулы" мәғәнәһендәге икенсе өлөшө, мәҫ.*, **глубоково́дный** тәрән һыулы; **мелково́дный** һай һыулы

**ВОДО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һыу", "һыу менән" тигән мәғәнәләрҙе аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **водолече́ние** һыу менән дауалау; **водонагрева́тель** һыу йылытҡыс

**ВОДОБОЯ́ЗНЬ** *ж*; *мед.* һыуҙан ҡурҡыу ауырыуы (*котороу ауырыуы*)

**ВОДОВО́З** *м* һыу ташыусы

**ВОДОВО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое һыу ташый торған, һыу ташыу ...ы; **водово́зная бо́чка** һыу ташый торған мискә

**ВОДОВОРО́Т** *м* **1.** упҡын, һыу өйөрмәһе, өйрөлмәк; **попа́сть в водоворо́т** өйрөлмәккә эләгеү **2.** *чего*; *перен.* өйөрмә, тулҡын; **водоворо́т жи́зни** тормош тулҡыны

**ВОДОГРЕ́ЙКА** *ж*; *разг.* һыу йылытҡыс (*королма*)

**ВОДОГРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое һыу йылытыу өсөн (йылыта торған), һыу йылытыу ...ы, һыу йылытҡыс; **водогре́йный котёл** һыу йылыта торған ҡаҙан

**ВОДОЁМ** *м* һыу яткылығы; **есте́ственный водоём** тәбиғи һыу ятҡылығы

**ВОДОЗАБО́Р** *м*; *гидротех.* **1.** (*установка*) һыу алыу ҡоролмаһы **2.** (*подача воды*) һыу алыу, һыу ебәреү

**ВОДОЗАБО́РНЫЙ,** -ая, -ое һыу ала торған, һыу алыу ...ы; **водозабо́рное сооруже́ние** һыу алыу ҡоролмаһы

**ВОДОИЗМЕРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыу үлсәү ...ы; **водоизмери́тельные прибо́ры** һыу үлсәү приборҙары

**ВОДОИЗМЕЩЕ́НИЕ** *с* судноның ауырлығы (*күпме һыуҙы ҡыҫырыҡлап сығарыуы менән иҫәпләнә*)

**ВОДОКА́ЧКА** *ж* водокачка, һыу ҡыуыу ҡоролмаһы (*һыу ятҡылығынан һыуҙы һурып, кәрәк ергә ебәреп торған насослы йорт*)

**ВОДОЛА́З** *м* водолаз (**1.** *һыу аҫтында эшләүсе кеше* **2.** *һыуға батыусыларҙы ҡотҡарыусы эт*)

**ВОДОЛЕ́Й** *м* **1.** *уст.* һыу түгеүсе (*эшсе*) **2.** *разг.*, *пренебр.* һыу ҡойоусы (*мәғәнәһеҙ буш һүҙ һөйләүсе йәки яҙыусы*) **3.** *астр.* Һыуғояр (*йондоҙлоҡ*)

**ВОДОЛЕЧЕ́БНИЦА** *ж* һыу менән дауаланыу урыны

**ВОДОЛЕЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое һыу менән дауалау ...ы; **водолече́бные процеду́ры** һыу менән дауалау процедуралары

**ВОДОЛЕЧЕ́НИЕ** *с* һыу менән дауалау

**ВОДОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое һыу яратыусы; **водолюби́вое расте́ние** һыу яратыусы үҫемлек

**ВОДОМЕ́Р** *м*; *тех.* һыу үлсәгес

**ВОДОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое һыу үлсәгес, һыу үлсәй торған; **водоме́рный кран** һыу үлсәгес кран ♦ **водоме́рное стекло́** *тех.* һыу үлсәгес көпшә (*көплө һауыт*); **водоме́рный пост** һыу үлсәй торған (*йылға, күлдәрҙә һ.б. һыу кимәлен үлсәй торған ҡоролма*)

**ВОДОМЁТ** *м* (*двигатель*) һыу атҡыс

**ВОДОМО́ИНА** *ж* йырҙа

**ВОДОНАПО́РНЫЙ: водонапо́рная ба́шня** *тех.* һыу һурҙырғыс башня

**ВОДОНЕПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* һыу үткәрмәүсәнлек; **водонепроница́емость пласта́** ер ҡатламының һыу үткәрмәүсәнлеге

**ВОДОНЕПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое һыу үткәрмәй торған, һыу үтмәй торған; **водонепроница́емая ткань** һыу үткәрмәй торған туҡыма

**ВОДОНО́С** *м* һыу ташыусы (*кеше*)

**ВОДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое һыулы, һыу булған; **водоно́сный пласт** һыулы ҡатлам

**ВОДООТВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое һыу бүлгес, һыу тараҡҡыс; **водоотво́дный кана́л** һыу бүлгес канал

**ВОДООТЛИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое һыу түгә торған, һыу бушатыу өсөн, һыу ағыҙыу өсөн; **водоотли́вный насо́с** һыу түгә торған насос

**ВОДООЧИСТИ́ТЕЛЬ** *м* һыу таҙартҡыс

**ВОДООЧИСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыу таҙартҡыс, һыу таҙарта торған, һыу сафлан-

дырғыс; **водоочисти́тельный фильтр** һыу таҙартҡыс фильтр

**ВОДОПА́Д** *м* шарлауыҡ

**ВОДОПЛА́ВАЮЩИЙ: водопла́вающие пти́цы** һыу ҡоштары

**ВОДОПЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое һыуҙан ағыҙа торған; **водопла́вные дрова́** һыуҙан ағыҙа торған утындар

**ВОДОПОДЪЁМНИК** *м* һыу күтәрткес

**ВОДОПОДЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое *гидротех.* һыу күтәртеү ...ы, һыу күтәргес; **водоподъёмная устано́вка** һыу күтәртеү ҡоролмаһы

**ВОДОПО́Й** *м* **1.** һыулау; **гнать скот к водопо́ю** малды һыулауға ҡыуыу **2.** һыу эсереү; **водопо́й на па́стбище** көтөүлектә һыу эсереү

**ВОДОПО́ЛЬЗОВАНИЕ** *с* һыу менән файҙаланыу; **поря́док водопо́льзования** һыу менән файҙаланыу тәртибе

**ВОДОПРИЁМНИК** *м* һыу йыйыу ҡоролмаһы

**ВОДОПРОВО́Д** *м* һыу үткәргес

**ВОДОПРОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое һыу үткәреү ...ы; **водопрово́дная сеть** һыу үткәреү селтәре

**ВОДОПРОВО́ДЧИК** *м* водопроводсы, һыу үткәргес эшсеһе

**ВОДОПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* һыу үткәреүсәнлек

**ВОДОПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое һыу үткәреүсән, һыу үткәрә торған; **водопроница́емые го́рные поро́ды** һыу үткәреүсән тау тоҡомдары

**ВОДОРАЗБО́РНЫЙ: водоразбо́рная коло́нка** һыу колонкаһы, һыу алыу колонкаһы

**ВОДОРАЗДЕ́Л** *м*; *геогр.* һыу айырғыс (*калҡыу урын*)

**ВОДОРАЗДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыу айырғыс, йылғаларҙы айыра торған; **водоразде́льный хребе́т** һыу айырғыс тау һырты

**ВОДОРЕ́З** *м*; *мор.* һыу ярғыс

**ВОДОРО́Д** *м* водород (*химик элемент, газ*)

**ВОДОРО́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое водородлы; **водоро́дистые мета́ллы** водородлы металдар

**ВОДОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *хим.* **1.** водород ...ы; **водоро́дный а́том** водород атомы **2.** водородлы; **водоро́дные соедине́ния** водородлы ҡушылмалар ♦ **водоро́дная бо́мба** водород бомбаһы

**ВО́ДОРОСЛИ** *мн.* (*ед.* **во́доросль** *ж*) **1.** *бот.* ылымыҡ **2.** *разг.* (*водные растения*) ылымыҡ, баҡа ебәге

**ВОДОСБО́Р** *м* **1.** һыу йыйыу **2.** һыу йыйыу ҡоролмаһы

**ВОДОСБРО́С** *м*; *гидротех.* һыу ебәргес (*һыуһаҡлағыстарҙан артыҡ һыуҙы ағыҙыу өсөн ҡулланма*)

**ВОДОСКА́Т** *м* гөрләүек, гөрөн

**ВОДОСЛИ́В** *м*; *гидротех.* һыу ағыҙғыс (*быуалағы артыҡ һыуҙы ағыҙыу өсөн эшләнгән арыҡ*)

**ВОДОСНАБЖЕ́НИЕ** *с* һыу менән тәьмин итеү

**ВОДОСПУ́СК** *м* һыу ебәргес (ағыҙғыс), арыҡ

**ВОДОСТО́К** *м* **1.** һыу аҡма (*һарҡыу урын*) **2.** һыулыҡ (*торба һ.б.*)

**ВОДОСТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое һыу ағып төшә торған, һыулыҡ ...ы; **водосто́чная труба́** һыулыҡ торбаһы

**ВОДОТО́К** *м*; *гидр.* һыу ағымы (ағышы)

**ВОДОУПО́РНЫЙ,** -ая, -ое һыуға сыҙам(лы); **водоупо́рная гли́на** һыуға сыҙамлы балсыҡ

**ВОДОХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* һыуһаҡлағыс

**ВО́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое араҡы ...ы; **во́дочный заво́д** араҡы заводы

**ВОДРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **водрузи́ть**

**ВОДРУЗИ́ТЬ** *сов. что* ҡаҙау, ҡаҙап ҡуйыу, ҡағып ҡуйыу, нығытыу; **водрузи́ть флаг на кры́шу** флагты ҡыйыҡҡа ҡағып ҡуйыу

**...ВО́ДСТВО** *с* (*урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең халыҡ хужалығы тармағын аңлатыусы икенсе өлөшө*); **животново́дство** малсылыҡ

**ВОДЯНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** һыуһыл, һыбау; **водяни́стые я́годы** һыуһыл еләк; **водяни́стый карто́фель** һыбау картуф **2.** төҫһөҙ, тоноҡ; **водяни́стые глаза́** төҫһөҙ күҙҙәр

**ВОДЯ́НКА** *ж*; *мед.* һары һыу ауырыуы

**ВОДЯНО́Й I,** -ая, -ое **1.** һыу ...ы; **водяна́я ка́пля** һыу тамсыһы **2.** (*как составная часть некоторых бот. и зоол. названий*) һыу ...ы, һыуҙа үҫә (йәшәй) торған; **водяно́й бык** (*птица*) мөңшөгөр, күл боғаһы; **водяно́й пау́к** һыу үрмәксеһе; **водяна́я кры́са** көшөл; **водяна́я ли́лия** томбойоҡ ♦ **водяны́е зна́ки** һыу билдәләре (*аҡсала, ҡағыҙҙа*); **водяно́е отопле́ние** һыу менән йылытыу

**ВОДЯНО́Й II** *м*; *фольк.* (*хозяин воды*) һыу эйәһе; (*хозяйка воды*) һыу инәһе

**ВОДЯ́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое һары һыу ауырыуы ...ы, һары йыйылыу; **водя́ночный отёк** һары һыу йыйылыуҙан шешенеү

**ВОЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** һуғышыу, һуғыш алып барыу; **воева́ть до после́дней ка́пли кро́ви** һуңғы һулышына тиклем һуғышыу **2.** *с кем-чем*; *перен.*, *разг.* көрәшеү, еңешеү, даулашыу, ыҙғышыу; **воева́ть с дома́шними** өйҙәгеләр менән даулашыу; **воева́ть с полово́дьем** ташҡын менән көрәшеү

**ВОЕВО́ДА** *м*; *ист.* воевода (*Боронғо Рустә ғәскәр башлығы*)

**ВОЕВО́ДСТВО** *с* **1.** *ист.* воеводалыҡ (*воевода дәрәжәһе*) **2.** *ист.* воеводство (*воевода идара иткән өлкә*) **3.** воеводалыҡ (*Польшала административ-территориаль берәмек*)

**ВОЕДИ́НО** *нареч.* бергә, бер бөтөн, бер урынға; **собра́ть всех воеди́но** барыһын бергә туплау (йыйыу)

**ВОЕНАЧА́ЛЬНИК** *м* ғәскәр башлығы, хәрби начальник (башлыҡ)

**ВОЕНИЗА́ЦИЯ** *ж* хәрбиләшеү; **военииза́ция промы́шленности** сәнәғәттең хәрбиләшеүе



6 зак. 2.0084.05

**ВОЕНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* хәрбиләштереү, хәрби эшкә өйрәтеү; **военизи́ровать наро́дное хозя́йство** халыҡ хужалығын хәрбиләштереү; **военизи́ровать населе́ние** халыҡты хәрби эшкә өйрәтеү

**ВОЕНИЗИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов. страд. от* **военизи́ровать**

**ВОЕНКО́М** *м* (*военный комиссар*) хәрби комиссар

**ВОЕНКОМА́Т** *м* (*военный комиссариат*) хәрби комиссариат

**ВОЕНКО́Р** *м* (*военный корреспондент*) хәрби корреспондент

**ВОЕ́ННО-...** и **ВОЕННО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һуғышҡа", "хәрби", "хәрби хеҙмәткә бәйле" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **вое́нно-полити́ческий** хәрби-сәйәси; **вое́нно-революцио́нный** хәрби-революцион; **военнослу́жащий** хәрби хеҙмәткәр

**ВОЕ́ННО-ВОЗДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое хәрби-һауа ...ы; **вое́нно-возду́шные си́лы** хәрби-һауа көстәре; **вое́нно-возду́шная акаде́мия** хәрби-һауа академияһы

**ВОЕ́ННО-МОРСКО́Й,** -ая, -ое хәрби-диңгеҙ ...ы; **вое́нно-морско́й флот** хәрби-диңгеҙ флоты

**ВОЕННООБЯ́ЗАННЫЙ** *м* хәрби хеҙмәткә бурыслы, хеҙмәт итергә тейеш (*кеше*)

**ВОЕННОПЛЕ́ННЫЙ** *м* әсир, һуғыш әсире, тотҡон

**ВОЕ́ННО-ПОЛЕВО́Й,** -ая, -ое хәрби-ялан ...ы; **вое́нно-полево́й суд** хәрби-ялан суды

**ВОЕННОСЛУ́ЖАЩИЙ** *м* хәрби хеҙмәткәр

**ВОЕ́ННО-УЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое хәрби-уҡыу ...ы; **вое́нно-уче́бный ко́рпус** хәрби-уҡыу корпусы

**ВОЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** һуғыш ...ы; **вое́нное вре́мя** һуғыш ваҡыты **2.** хәрби, ғәскәри; **вое́нная слу́жба** хәрби хеҙмәт; **вое́нная та́йна** хәрби сер; **вое́нное положе́ние** хәрби хәл; **вое́нное учи́лище** хәрби училище **3.** *в знач. сущ.* **вое́нный** *м* хәрби хеҙмәткәр, ғәскәри кеше

**ВОЕНРУ́К** *м* (*военный руководитель*) хәрби етәксе (*уҡыу йорттарында*)

**ВОЕ́НЩИНА** *ж* **1.** *собир.* ғәскәриҙәр; **с то́чки зре́ния вое́нщины** ғәскәриҙәр күҙлегенән **2.** һуғыш суҡмарҙары; **герма́нская вое́нщина** герман һуғыш суҡмарҙары

**ВОЖА́К** *м* **1.** башлап барыусы, оҙатып барыусы, оҙатыусы, юл күрһәтеүсе; **вожако́м взя́ли лесника́** юл күрһәтеүсе итеп урман ҡарауылсыһын алдылар **2.** башлыҡ, етәксе; **вожа́к молодёжи** йәштәр етәксеһе

**ВОЖА́ТАЯ** *ж* вожатый ҡатын-ҡыҙ

**ВОЖА́ТЫЙ** *м* **1.** *уст.* (*вожак*) оҙатып барыусы, оҙатыусы, юл күрһәтеүсе **2.** башлыҡ, башлап барыусы **3.** вожатый (*пионер отряды йәки дружинаһының етәксеһе*); **вожа́тый тре́тьего отря́да** өсөнсө отряд вожатыйы **4.** *разг.* (*вагоновожатый*) трамвай йөрөтөүсе

**ВОЖДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** (*сильное желание*) көслө теләк, нәфсе **2.** (*половое влечение*) енси теләк, шәһүәт

**ВОЖДЕЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* көтөп алынған, зарығып көтөлгән; **вожделе́нный о́тдых** көтөп алынған ял

**ВОЖДЬ** *м* **1.** башлыҡ; **вождь ски́фов** скифтар башлығы **2.** *высок.* етәксе, остаз **3.** юлбашсы; **наро́дный вождь** халыҡ юлбашсыһы

**ВО́ЖЖИ** *мн.* (*ед.* **вожжа́** *ж*) дилбегә ♦ **вожжа́ под хвост попа́ла** *кому; прост.* артыҡ көйһөҙләнеү, килделе-киттелерәк кеше тураһында; **прибра́ть во́жжи к рука́м; держа́ть во́жжи в рука́х** дилбегәне ҡулда ныҡ тотоу (*власть, етәкселеккә ҡарата*)

**ВОЗ** *м* **1.** (*повозка, груз*) йөк, ылау; **воз дров** бер йөк утын **2.** *перен., разг.* (*множество*) бик күп, бер йөк; **воз новосте́й** бик күп яңылыҡтар

**ВОЗ...** (**вос...**) *приставка* **1.** "*мендереү*" *тигән ҡылым ярҙамында тәржемә ителә*; **вознести́** күтәреп мендереү

**2.** "*яңынан*" *тигән рәүеш ярҙамында*; **возроди́ть** яңынан барлыҡҡа килтереү; **возобнови́ть** яңыртыу, яңынан башлау

**3.** *хәрәкәттең нимәгәлер яуап булыуын белдерә*; **возда́ть** ҡайтарыу, түләү; **вознагради́ть** бүләкләү

**4.** "*бик нык*" *тигән рәүеш ярҙамында*; **возлюби́ть** бик ныҡ яратыу; **возра́доваться** бик ныҡ шатланыу

**ВОЗБРАНИ́ТЬ** *сов. что; уст.* тыйыу, рөхсәт итмәү

**ВОЗБРАНЯ́ТЬ** *несов. что; уст. см.* **возбрани́ть**

**ВОЗБРАНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *уст.* тыйылыу, рөхсәт ителмәү; **ходи́ть здесь не возбраня́ется** бында йөрөү тыйылмай (рөхсәт ителә) **2.** *страд. от* **возбраня́ть**

**ВОЗБУДИ́МОСТЬ** *ж* **1.** тәьҫиргә бирелеү, тәьҫирләнеү **2.** *физиол.* ярһыусанлыҡ

**ВОЗБУДИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** тиҙ тәьҫирләнеүсән, тәьҫиргә бирелеүсән, тоҡаныусан; **возбуди́мый челове́к** тиҙ тәьҫирләнеүсән кеше **2.** *физиол.* ярһыусан, ҡуҙғыусан; **возбуди́мые тка́ни** ҡуҙғыусан туҡымалар

**ВОЗБУДИ́ТЕЛЬ** *м* барлыҡҡа килтереүсе, ҡуҙғытыусы, тыуҙырыусы, тыуҙырғыс; **возбуди́тель эне́ргии** энергия барлыҡҡа килтереүсе; **возбуди́тель боле́зни** ауырыу тыуҙырыусы

**ВОЗБУДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡуҙғытыу, тыуҙырыу, уятыу; **возбуди́ть любопы́тство** ҡыҙыҡһыныу уятыу; **возбуди́ть аппети́т** аппетит ҡуҙғытыу **2.** *что* ҡуҙғатыу, күтәреү; **возбуди́ть вопро́с** һорау ҡуҙғатыу **3.** *кого-что* ярһытыу, ҡыҙҙырыу, тоҡандырыу, әҫәрләндереү; **возбуди́ть больно́го** ауырыуҙы ярһытыу **4.** *против кого-чего* ҡаршы ҡуйыу, ҡотортоу; **возбуди́ть люде́й про́тив себя́** кешеләрҙе үҙеңә ҡаршы ҡуйыу

**ВОЗБУДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*возникнуть*) уяныу, барлыҡҡа килеү; **возбуди́лось любопы́тство** ҡыҙыҡһыныу уянды **2.** (*взволноваться*) ҡыҙыу, ярһыу, ярһып (ҡыҙып) китеү, әҫәрләнеү

**ВОЗБУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **возбуди́ть**

**ВОЗБУЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **возбуди́ться 2.** *страд. от* **возбужда́ть**

**ВОЗБУЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** уятыу, тыуҙырыу, ҡуҙғытыу; **возбужде́ние любопы́тства** ҡыҙыҡһыныу уятыу; **возбужде́ние то́ка в проводнике́** үткәргестә (тимер сыбыҡта) ток барлыҡҡа килеү **2.** ҡуҙғатыу, күтәреү; **возбужде́ние уголо́вного де́ла** енәйәт эше ҡуҙғатыу **3.** ҡыҙыу, ярһыу, ярһып (ҡыҙып) китеү, әҫәрләнеү; **возбужде́ние больно́го** ауырыуҙың ярһыуы **4.** *физиол.* ярһыу; **возбужде́ние и торможе́ние в коре́ больши́х полуша́рий головно́го мо́зга** баш мейеһенең ҙур ярымшарҙар ҡабығындағы ярһыу һәм тотҡарланыу

**ВОЗБУЖДЁННОСТЬ** *ж* ярһыулыҡ, ныҡ тәьҫирләнеү; **чу́вство возбуждённости** ныҡ тәьҫирләнеү

**ВОЗБУЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **возбуди́ть 2.** *прил.* ярһыу(лы); **возбуждённый вид** ярһыу ҡиәфәт

**ВОЗВЕДЕ́НИЕ** *с* **1.** *чего* һалыу, төҙөү, ҡороу, өйөү; **возведе́ние фунда́мента** нигеҙ һалыу; **возведе́ние на́сыпи** тупраҡ өйөү **2.** *кого-что, во что*; *перен.* күтәреү, дәрәжә биреү; **возведе́ние в генера́лы** генерал дәрәжәһенә күтәреү **3.** *чего, на кого-что* ғәйеп тағыу, яла яғыу; **возведе́ние обвине́ния** *на кого-л.* ғәйеп тағыу **4.** әйләндереү, менән бәйләү; **возведе́ние в при́нцип** *чего-л.* *нимәнелер* принципҡа әйләндереү

**ВОЗВЕЛИ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **возвели́чить**

**ВОЗВЕЛИ́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *высок.* ҙурлау, ололау, данлау; **возвели́чить свой наро́д** үҙ халҡыңды ҙурлау

**ВОЗВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что*; *уст., высок.* етәкләп мендереү, етәкләп күтәреү, етәкләп алып барып ултыртыу; **возвести́ на сце́ну** *кого-л.* *кемделер* сәхнәгә етәкләп мендереү **2.** (күҙҙе) күтәреү, (ҡарашты) йүнәлтеү, юғарыға ҡарау; **возвести́ глаза́** ҡарашты өҫкә йүнәлтеү **3.** *в кого-что*; *перен.* күтәреү, дәрәжә биреү; **возвести́ в наро́дные арти́сты респу́блики** республиканың халыҡ артисы дәрәжәһенә күтәреү **4.** *во что* әһәмиәт биреү; **возвести́ в культ** культ кимәленә күтәреү **5.** *что* ҡороу, өйөү, һалыу, төҙөү; **возвести́ сте́ну** стена һалыу **6.** *на кого* ғәйеп тағыу, яла яғыу; **возвести́ обвине́ние** ғәйеп тағыу **7.** *что, к чему* менән бәйләү, менән аңлатыу; **возвести́ не́которые обы́чаи к дре́вности** ҡайһы бер йолаларҙы боронғо менән бәйләү ♦ **возвести́ в сте́пень** *мат.* дәрәжәгә күтәреү; **возвести́ на престо́л (на трон)** тәхеткә ултыртыу

**ВОЗВЕСТИ́ТЬ** *сов. что, о чём* хәбәр итеү, белдереү, иғлан итеү; **возвести́ть о прибы́тии арти́стов** артистар килеү тураһында хәбәр итеү

**ВОЗВЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **возвести́ть**

**ВОЗВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **возвести́**

**ВОЗВРА́Т** *м* **1.** кире ҡайтарыу (биреү), ҡайтарып биреү; **возвра́т ссу́ды** ссуданы кире ҡайтарыу; **возвра́т уче́бников** дәреслектәрҙе ҡайтарып биреү **2.** кире ҡайтыу; **возвра́т боле́зни** ауырыуҙың кире ҡайтыуы (башланыуы); **возвра́т солда́та домо́й** һалдаттың өйгә әйләнеп ҡайтыуы

**ВОЗВРАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* кире биреү, ҡайтарыу, ҡайтарып биреү, кире ҡайтарыу; **возврати́ть ру́копись а́втору** ҡулъяҙманы авторға кире ҡайтарыу; **возврати́ть права́** хоҡуҡты ҡайтарыу **2.** *что* кире (яңынан) ҡайтарыу, аяҡҡа баҫтырыу; **возврати́ть здоро́вье** сәләмәтлекте кире ҡайтарыу **3.** *кого-что* (*заставить вернуться*) бороп (кире) ҡайтарыу; **возврати́ть дете́й домо́й** балаларҙы өйгә кире ҡайтарыу ♦ **возврати́ть к жи́зни** һушына килтереү, сәләмәтләндереү

**ВОЗВРАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡайтыу, кире ҡайтыу, әйләнеп ҡайтыу; **возврати́ться в шко́лу** мәктәпкә кире ҡайтыу **2.** *перен.* (*вновь появиться — о настроении, чувствах*) яңынан барлыҡҡа килеү, ҡайтанан килеү, килеү; **созна́ние возврати́лось к больно́му** ауырыу аңына килде **3.** яңынан үткәнгә (элеккегә) ҡайтыу; **возврати́ться к про́йденному** яңынан үткәнгә ҡайтыу

**ВОЗВРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кире ҡайтыу ...ы, ҡайтыу ...ы; **возвра́тный путь** кире ҡайтыу юлы **2.** (*о болезни*) ҡабатланмалы, ҡайтмалы; **возвра́тный тиф** ҡайтмалы тиф **3.** (*о денежных средствах*) ҡайтарылырға тейешле; **возвра́тная ссу́да** ҡайтарылырға тейешле ссуда **4.** *грам.* ҡайтым ...ы; **возвра́тный зало́г в башки́рском языке́** башҡорт телендә ҡайтым йүнәлеше

**ВОЗВРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **возврати́ть**

**ВОЗВРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **возврати́ться 2.** *страд. от* **возвраща́ть**

**ВОЗВРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** кире ҡайтарыу; **возвраще́ние до́лга** бурысты кире ҡайтарыу **2.** кире ҡайтыу, ҡайтыу; **возвраще́ние домо́й** өйгә ҡайтыу; **возвраще́ние к пре́жним заня́тиям** элекке шөғөлгә кире ҡайтыу

**ВОЗВЫ́СИТЬ** *сов.* **1.** *что*; *уст.* күтәреү, юғарыраҡ (өҫкәрәк) күтәреү, бейегәйтеү, бейегерәк итеү; **возвы́сить фунда́мент до́ма** йорт нигеҙен бейегәйтеү **2.** *кого-что* күтәреү, дәрәжәһен күтәреү; **он возвы́сил свой род** ул үҙ нәҫеленең дәрәжәһен күтәрҙе **3.** *уст.* (*цену, стоимость*) күтәреү, хаҡ күтәреү; **возвы́сить це́ну на у́голь** күмергә хаҡ күтәреү **4.** (*усилить*) күтәреү, көсәйтеү; **возвы́сить го́лос** тауыш(ты) күтәреү

**ВОЗВЫ́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* күтәрелеү, юғары күтәрелеү; **у́ровень воды́ значи́тельно возвы́сился** һыу кимәле байтаҡ күтәрелде **2.** (дәрәжәһе) күтәрелеү, (абруйы) үҫеү, үҫеп, күтәрелеп китеү; **жела́ние возвы́ситься** күтәрелеү теләге **3.** (*о голосе*) көсәйеү; **его́ го́лос возвы́сился** уның тауышы көсәйҙе

**ВОЗВЫША́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **возвы́сить 2.** *кого* (*облагораживать*) (рухи яҡтан) күтәреү, матурлау; **че́стность возвыша́ет челове́ка** намыҫлы булыу кешене матурлай

**ВОЗВЫША́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **возвыша́ть**

**ВОЗВЫШЕ́НИЕ** *с* **1.** күтәреү, күтәрелеү; **возвыше́ние Моско́вского госуда́рства** Мәскәү дәүләтенең күтәрелеүе; **возвыше́ние го́лоса** тауыш күтәреү **2.** ҡалҡыу урын, бейек урын, ҡалҡыулыҡ; **стоя́ть на возвыше́нии** ҡалҡыу урында тороу

**ВОЗВЫ́ШЕННОСТЬ** *ж* **1.** *геогр.* ҡалҡыулыҡ; **Приво́лжская возвы́шенность** Волга буйы ҡалҡыулығы **2.** юғарылыҡ, күтәренкелек, рухи матурлыҡ; **возвы́шенность иде́й** идеялар юғарылығы

**ВОЗВЫ́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡалҡыу, ҡалҡып торған; **возвы́шенное ме́сто** ҡалҡыу урын **2.** юғары, рухи яҡтан матур (камил); **возвы́шенная цель** юғары маҡсат; **возвы́шенные иде́и** юғары идеялар

**ВОЗГЛА́ВИТЬ** *сов. кого-что* башында тороу, етәкләү, етәкселек итеү; **возгла́вить движе́ние** хәрәкәткә етәкселек итеү (башында тороу); **возгла́вить коми́ссию** комиссияға етәкселек итеү

**ВОЗГЛАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **возгла́вить**

**ВО́ЗГЛАС** *м* тауыш, ауаз; **ра́достные во́згласы** шатлыҡлы тауыштар; **одобри́тельные во́згласы** хуплау ауаздары

**ВОЗГЛАСИ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *высок.* ҡысҡырып әйтеү (белдереү), иғлан итеү, тантаналы рәүештә иғлан итеү (белдереү); **возгласи́ть здра́вицу в честь дру́га** дуҫтың һаулығы өсөн тантаналы рәүештә тост әйтеү

**ВОЗГЛАША́ТЬ** *несов. см.* **возгласи́ть**

**ВОЗГО́НКА** *ж*; *хим.* газға әйләнеү (*ҡаты матдәнең газға әйләнеүе*), ҡыҙҙырып ҡыуыу

**ВОЗГОНЯ́ТЬ** *несов. что*; *хим.* газға әүерелдереү

**ВОЗГОРА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *спец.* тиҙ тоҡаныусан

**ВОЗГОРА́НИЕ** *с см.* **возгора́ть, возгора́ться**

**ВОЗГОРА́ТЬ** *несов. см.* **возгоре́ться**

**ВОЗГОРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **возгоре́ться**

**ВОЗГОРДИ́ТЬСЯ** *сов. чем* и *без доп.* маһайыу, эреләнеү, ҡупайыу, кәпәренеп китеү, тәкәбберләнеү

**ВОЗГОРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* яна башлау, янып (тоҡанып) китеү, ҡабыныу, дөрләп яныу **2.** *перен.* (*внезапно возникнуть*) тоҡаныу, тоҡанып (башланып) китеү; **возгоре́лась борьба́** көрәш башланып китте **3.** *чем*; *перен.* (*каким-л. желанием, чувством*) ҡабыныу, уяныу (*хистәр тураһында*)

**ВОЗДАВА́ТЬ** *несов. см.* **возда́ть**

**ВОЗДА́ТЬ** *сов.*; *уст., высок.* **1.** *что, кому-чему* биреү, күрһәтеү; **возда́ть до́лжное** тейешлеһен биреү; **возда́ть во́инские по́чести** хәрби хөрмәт күрһәтеү **2.** *чем* ҡайтарыу, әжерен ҡайтарыу, түләү; **возда́ть добро́м за зло** яманлыҡҡа яҡшылыҡ менән ҡайтарыу

**ВОЗДАЯ́НИЕ** *с*; *уст., высок.* бүләк, әжер, түләү, ҡоһор

**ВОЗДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **воздви́гнуть**

**ВОЗДВИ́ГНУТЬ** *сов. что* һалыу, ҡороу, төҙөү, тергеҙеү; **воздви́гнуть па́мятник** һәйкәл һалыу

**ВОЗДЕ́ЙСТВИЕ** *с* йоғонто, тәьҫир; **оказа́ть мора́льное возде́йствие** мораль йоғонто яһау; **находи́ться под возде́йствием** *кого-чего-л. кемдеңдер* тәьҫире аҫтында булыу

**ВОЗДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *сов., несов. на кого-что* тәьҫир итеү, йоғонто яһау; **возде́йствовать си́лой приме́ра** үрнәк менән тәьҫир итеү

**ВОЗДЕ́ЛАТЬ** *сов. см.* **возде́лывать**

**ВОЗДЕ́ЛЫВАНИЕ** *с* **1.** эшкәртеү; **возде́лывание поле́й** баҫыуҙарҙы эшкәртеү **2.** үҫтереү, игеү; **возде́лывание овощны́х культу́р** йәшелсә культуралары үҫтереү

**ВОЗДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. что* **1.** эшкәртеү; **возде́лывать зе́млю** ер эшкәртеү **2.** үҫтереү, игеү; **возде́лывать лён** етен үҫтереү

**ВОЗДЕРЖА́ВШИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич.* тыйылған, баш тартҡан **2.** *в знач. сущ.* **воздержа́вшийся** *м* тауыш бирмәй ҡалыусы; **при голосова́нии воздержа́вшихся не́ было** һайлағанда тауыш бирмәй ҡалыусылар булманы

**ВОЗДЕРЖА́НИЕ** *с* тыйылыу, һаҡланыу, нәфсене тыйыу; **воздержа́ние в еде́** ашауҙан тыйылыу

**ВОЗДЕ́РЖАННОСТЬ** *ж* тыйнаҡлыҡ, тотанаҡлыҡ, сабырлыҡ; **прояви́ть возде́ржанность** тотанаҡлыҡ күрһәтеү

**ВОЗДЕ́РЖАННЫЙ,** -ая, -ое тыйнаҡ, тотанаҡлы, сабыр; **возде́ржанный челове́к** тотанаҡлы кеше

**ВОЗДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов. от чего* **1.** тыйылыу, баш тартыу; **воздержа́ться от куре́ния** тәмәке тартыуҙан тыйылыу; **воздержа́ться от отве́та** яуап биреүҙән баш тартыу **2.** бирмәй ҡалыу, тыйылып ҡалыу; **воздержа́ться от голосова́ния** һайлағанда тауыш бирмәй ҡалыу

**ВОЗДЕ́РЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **воздержа́ться**

**ВОЗДЕ́ТЬ: возде́ть ру́ки** *книжн.* ҡулдарҙы юғары күтәреү (*үтенес, ҡаршылыҡ һ.б. белдереп*)

**ВО́ЗДУХ** *м* һауа; **све́жий во́здух** саф һауа; **спёртый во́здух** тынсыу һауа; **давле́ние во́здуха** һауа баҫымы; **горе́ние в во́здухе** һауала яныу; **дыша́ть све́жим во́здухом** саф һауа һулау ♦ **во́здух!** һауа! (*дошман самолётының килеүен белдерә*); **в во́здухе но́сится** һиҙелә, беленә (*ниҙеңдер булыуы, килеүе һ.б.*); **взлете́ть в во́здух**: 1) шартлап емерелеү, юҡҡа сығыу; 2) хыял,

пландар юҡҡа сығыу; **дыша́ть во́здухом** *каким, чего* әйләнә-тирәләге хәл-ваҡиға менән йәшәү; **на (откры́том) во́здухе** тышта (асыҡ һауала) булыу; **пови́снуть в во́здухе** хәл ителмәү

**ВОЗДУХО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һауа", "һауаға ҡараған", "һауаға бәйләнешле" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **воздухово́д** һауа үткәргес; **воздухонагрева́тель** һауа йылытҡыс

**ВОЗДУХОДУ́ВКА** *ж*; *тех.* һауа өрҙөргөс (*домна мейестәренә һауа биреүсе машина*)

**ВОЗДУХОПЛА́ВАНИЕ** *с* һауала осоу (*һауанан еңел булған аппараттарҙа осоу теорияһы һәм практикаһы*)

**ВОЗДУХОПЛА́ВАТЕЛЬ** *м* һауала осоусы

**ВОЗДУХОПЛА́ВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һауала осоу ...ы, һауала оса торған; **воздухопла́вательный аппара́т** һауала осоу аппараты

**ВОЗДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һауа ...ы; **возду́шная струя́** һауа ағымы; **возду́шное сообще́ние** һауа юлы **2.** һауа менән, һауа ...ы, һауа ярҙамында; **возду́шный то́рмоз** һауа тормозы; **возду́шное охлажде́ние** һауа менән һыуытыу **3.** *перен.* еңел, бик нәфис, өрфөйә; **возду́шная похо́дка** еңел атлап йөрөү; **возду́шное пла́тье** өрфөйә күлдәк ♦ **возду́шная ва́нна** һауа ваннаһы; **возду́шная трево́га** һауа тревогаһы; **стро́ить возду́шные за́мки** буш хыял ҡороу; **возду́шный поцелу́й** ым менән үбеү

**ВОЗЖЕ́ЧЬ** *сов. что*; *уст.* **1.** (*зажечь*) тоҡандырыу, тоҡандырып ебәреү, яндырыу, яндырып ебәреү, ҡабыҙыу, ҡабыҙып ебәреү **2.** *перен.* ҡабыҙыу, уятыу

**ВОЗЗВА́НИЕ** *с* өндәмә, саҡырыу

**ВОЗЗВА́ТЬ** *сов. к кому-чему*; *высок.* саҡырыу, мөрәжәғәт итеү; **воззва́ть к восста́нию** баш күтәреүгә саҡырыу

**ВОЗЗРЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* ҡараш, фекер; **излага́ть свои́ воззре́ния** үҙ ҡараштарыңды һөйләү

**ВОЗИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ташыу, килтереү; **вози́ть кирпи́ч на стро́йку** төҙөлөшкә кирбес ташыу **2.** *что*; *разг.* (*волочить, таскать*) һөйрәү, һөйрәп йөрөтөү; **вози́ть по́ полу** иҙән буйлап һөйрәү **3.** *чем*; *разг.* йөрөтөү; **вози́ть руко́й по столу́** ҡулды өҫтәл өҫтөнән йөрөтөү ♦ **вози́ть во́ду** *на ком кемде лә булһа* баҫып эшләтеү, эшкә егеү

**ВОЗИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** айҡашыу, ығы-зығы килеү, ҡайнашыу; **де́ти вози́лись на полу́** балалар иҙәндә айҡаша ине **2.** булашыу, шөғөлләнеү, аҙапланыу, маташыу; **ма́льчик вози́лся с соба́кой** малай эт менән булаша ине; **вози́ться с устро́йством вы́ставки** күргәҙмә урынлаштырыу менән шөғөлләнеү **3.** *разг.* мыштырлау; **ну что ты во́зишься?** йә, нимә һин мыштырлайһың?

**ВО́ЗКА** *ж*; *разг. от* **вози́ть** 1

**ВОЗЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **возложи́ть** ♦ **возлага́ть наде́жды** *на кого-что* өмөт бағлау; **возлага́ть отве́тственность** *на кого-что* яуаплылыҡ йөкмәтеү

**ВО́ЗЛЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* янында, эргәһендә; **ве́щи лежа́ли во́зле** әйберҙәр эргәлә ята ине **2.** *предлог с род. п.* янында, эргәһендә, эргәләп; **во́зле до́ма** өй янында

**ВОЗЛЕЖА́ТЬ** *несов. на чём*; *уст.* ятыу, ятып тороу

**ВОЗЛИКОВА́ТЬ** *сов.* бик ныҡ ҡыуаныу (шатланыу)

**ВОЗЛИЯ́НИЕ** *с*; *шутл.* (*выпивка*) эсеү, һалыу

**ВОЗЛОЖЕ́НИЕ** *с см.* **возложи́ть**; **возложе́ние цвето́в к па́мятнику** һәйкәлгә сәскәләр һалыу

**ВОЗЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (тантаналы рәүештә) һалыу, ҡуйыу; **возложи́ть венки́** веноктар һалыу **2.** йөкмәтеү, тапшырыу, ауҙарыу ♦ **возложи́ть отве́тственность** *на кого-л. кемгә булһа ла* яуаплылыҡты йөкмәтеү; **возложи́ть вину́** *на кого кемгәлер* ғәйепте ауҙарыу

**ВОЗЛЮБИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *уст.* яратыу, һөйөү

**ВОЗЛЮ́БЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **возлюби́ть 2.** *прил.*; *высок.* һөйөклө, ныҡ яратҡан, ныҡ һөйгән; **возлю́бленная вну́чка** ныҡ яратҡан ейәнсәр **3.** *в знач. сущ.* **возлю́бленный** *м* и **возлю́бленная** *ж* һөйгән йәр, яратҡан кеше, һөйәркә (һөйәр)

**ВОЗМЕ́ЗДИЕ** *с*; *высок.* яза, яуап язаһы, ҡоһор; **справедли́вое возме́здие** ғәҙел яза

**ВОЗМЕСТИ́ТЬ** *сов. что* ҡаплау, ҡайтарыу; **возмести́ть убы́тки** зыянды ҡаплау

**ВОЗМЕЧТА́ТЬ** *сов.* хыялланыу, хыялға бирелеү

**ВОЗМЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **возмести́ть**

**ВОЗМО́ЖНО 1.** *нареч.* мөмкин тиклем, мөмкин булған тиклем; **сде́лать возмо́жно лу́чше** мөмкин тиклем һәйбәтерәк эшләргә; **принести́ возмо́жно скоре́е** мөмкин булған тиклем тиҙерәк килтереү **2.** *в знач. сказ., безл.* мөмкин, мөмкинселек булыу, мөмкин булыу; **о́чень возмо́жно** бик мөмкин **3.** *в знач. вводн. сл.* бәлки, ихтимал; **мне, возмо́жно, придётся съе́здить** бәлки, миңә барып ҡайтырға тура килер

**ВОЗМО́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** булыу, булғанлыҡ, ихтималлыҡ; **возмо́жность тако́го реше́ния сомни́тельна** шундай ҡарарҙың булыуы шикле **2.** мөмкинлек; **возмо́жность должна́ быть испо́льзована** мөмкинлек файҙаланылырға тейеш **3.** *мн.* **возмо́жности** мөмкинлектәр, мөмкинселектәр; **материа́льные возмо́жности** матди мөмкинлектәр ♦ **до после́дней возмо́жности** һуңғы мөмкинселеккә тиклем; **нет возмо́жности** мөмкинселек юҡ, мөмкин түгел; **по возмо́жности**; **по ме́ре возмо́жности** мөмкин булған тиклем, мөмкин булғанса

**ВОЗМО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое мөмкин, мөмкин булған, булыуы мөмкин, ихтимал, ихтимал бул-

ған, булыуы ихтимал; **возмо́жный отве́т** мөмкин булған яуап

**ВОЗМУЖА́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** балиғ булған, үҫеп еткән **2.** өлкәнәйгән, ир ҡорона ингән; **возмужа́лый вид** өлкәнәйгән ҡиәфәт

**ВОЗМУЖА́ТЬ** *сов.* **1.** (*физически окрепнуть*) үҫеп етеү, буйға етеү **2.** (*достигнуть зрелости*) балиғ булыу, ир ҡорона инеү (ултырыу), өлкәнәйеү

**ВОЗМУТИ́ТЕЛЬ** *м* боҙоусы, болартыусы; **возмути́тель споко́йствия** тыныслыҡты боҙоусы

**ВОЗМУТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое асыу ҡабартҡыс (тыуҙырғыс, килтергес), асыу ҡабарта (килтерә, тыуҙыра) торған, асыу ҡабартырлыҡ (тыуҙырырлыҡ, килтерерлек); **возмути́тельный посту́пок** асыу килтерә торған ҡылыҡ

**ВОЗМУТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** асыуландырыу, асыу килтереү (тыуҙырыу, ҡабартыу); **возмути́ть наро́д** халыҡты асыуландырыу **2.** *уст.* ҡотҡо һалыу, ҡотортоу, сыуалыш тыуҙырыу

**ВОЗМУТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асыу килеү, асыу ҡабарыу, асыуланыу; **возмути́ться поведе́нием** *чьим-л. кемдеңдер* тәртибенә асыу килеү **2.** *уст.* баш күтәреү, фетнә (бола) сығарыу, сыуалышыу

**ВОЗМУЩА́ТЬ** *несов. см.* **возмути́ть**

**ВОЗМУЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **возмути́ться** **2.** *страд. от* **возмуща́ть**

**ВОЗМУЩЕ́НИЕ** *с* **1.** асыу, асыу килеү; **чу́вство возмуще́ния** асыу тойғоһо **2.** *уст.* фетнә, баш күтәреү, сыуалыш; **день возмуще́ния декабри́стов** декабристарҙың баш күтәреү көнө

**ВОЗМУЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **возмути́ть** **2.** *прил.* асыулы; **возмущённый вид** асыулы ҡиәфәт

**ВОЗНАГРАДИ́ТЬ** *сов. кого-что* бүләкләү, ризалатыу; **вознагради́ть за труд** хеҙмәт өсөн бүләкләү

**ВОЗНАГРАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **вознагради́ть**

**ВОЗНАГРАЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вознагради́ть**; **вознагражде́ние за долголе́тнюю слу́жбу** оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән өсөн бүләкләү **2.** бүләк, хаҡ, әжер; **де́нежное вознагражде́ние** аҡсалата бүләк

**ВОЗНЕГОДОВА́ТЬ** *сов. на кого-что*; *книжн.* асыу килеү, асыу ҡабарыу, ныҡ асыуланыу

**ВОЗНЕНАВИ́ДЕТЬ** *сов. кого-что* күрә алмау, нәфрәтләнеү, нәфрәт уяныу, нәфрәт тыуыу

**ВОЗНЕСТИ́** *сов. кого-что* **1.** *высок.* өҫкә (юғары) күтәреү **2.** *перен.* маҡтау, күккә күтәреү; **вознести́ до небе́с** күккә күтәреп маҡтау

**ВОЗНЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** *высок.* күтәрелеү, олғашыу, юғарыға күтәрелеү; **вознести́сь в облака́** болоттарға олғашыу **2.** *перен.* тәкәбберләнеү, һауаланыу, эреләнеү

**ВОЗНИКА́ТЬ** *несов. см.* **возни́кнуть**

**ВОЗНИКНОВЕ́НИЕ** *с* барлыҡҡа килеү, тыуыу, (килеп) сығыу; **возникнове́ние жи́зни на земле́** ерҙә тереклек барлыҡҡа килеү; **возникнове́ние ча́стной со́бственности** хосуси милек барлыҡҡа килеү; **возникнове́ние пожа́ра** янғын сығыу

**ВОЗНИ́КНУТЬ** *сов.* барлыҡҡа килеү, тыуыу, килеп сығыу

**ВОЗНИ́ЦА** *м* күсер

**ВОЗНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **вознести́**

**ВОЗНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вознести́сь** **2.** *страд. от* **возноси́ть**

**ВОЗНЯ́** *ж*; *разг.* **1.** ығы-зығы, шау-шыу; **де́ти по́дняли возню́** балалар ығы-зығы күтәрҙеләр **2.** (*хлопоты*) мәшәҡәт, мәшәҡәтле эш; **возня́ с устано́вкой прибо́ров** приборҙар урынлаштырыу мәшәҡәте

**ВОЗОБНОВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** яңынан башлау; **возобнови́ть рабо́ту** эште яңынан башлау; **возобнови́ть пре́рванный разгово́р** бүленгән һөйләшеүҙе яңынан башлау **2.** элекке хәленә ҡайтарыу, торғоҙоу, аяҡҡа баҫтырыу, яңыртыу; **возобнови́ть запу́щенное хозя́йство** ташландыҡ хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу

**ВОЗОБНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* яңынан башланыу, ҡайтанан башланыу, тергеҙеү; **заня́тия возобнови́лись** дәрестәр яңынан башланды

**ВОЗОБНОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **возобнови́ть, возобнови́ться** ♦ **возобновле́ние де́ятельности** эшмәкәрлекте аяҡҡа баҫтырыу; **возобновле́ние суде́бного де́ла** суд эшен яңынан башлау (ҡарау)

**ВОЗОБНОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **возобнови́ть**

**ВОЗОБНОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **возобнови́ться** **2.** *страд. от* **возобновля́ть**

**ВОЗОВО́Й,** -ая, -ое йөк ...ы; **возовы́е весы́** йөк үлсәүе

**ВОЗО́К** *м* көймәле сана

**ВОЗОМНИ́ТЬ** *сов.* (*обычно в сочетании со словами "о себе", "себя"*); *разг.* маһайыу, ҡупайыу, үҙен әллә кемгә ҡуйыу

**ВОЗОПИ́ТЬ** *сов.*; *уст.* ныҡ итеп ҡысҡырыу, аҡырыу

**ВОЗРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **возрази́ть**

**ВОЗРАЖЕ́НИЕ** *с см.* **возрази́ть — возража́ть**; **прое́кт встре́тил возраже́ния** проект ҡаршылыҡҡа осраны; **возраже́ний нет** ҡаршылыҡ юҡ

**ВОЗРАЗИ́ТЬ** *сов.* ҡаршы килеү, ҡаршы төшөү, ҡаршы әйтеү; **возрази́ть про́тив** *чего-л. нимәгәләр* ҡаршы килеү

**ВО́ЗРАСТ** *м* йәш; **де́ти шко́льного во́зраста** мәктәп йәшендәге балалар; **лю́ди одного́ во́зраста** бер йәштәге кешеләр ♦ **войти́ в во́зраст** балиғ булыу; **вы́йти из во́зраста** йәше уҙыу; **в во́зрасте** үҫеп еткән

**ВОЗРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **возрасти́**

**ВОЗРАСТИ́** *сов.* үҫеү, артыу, көсәйеү; **дохо́ды населе́ния возросли́** халыҡтың килеме артты; **тре́бования возраста́ют** талаптар көсәйә

**ВОЗРАСТНО́Й,** -ая, -ое йәш ...ы, йәш яғынан, йәшкә бәйле, йәш буйынса; **возрастно́й ценз** йәш цензы; **возрастны́е измене́ния** йәшкә бәйле үҙгәрештәр; **возрастно́й соста́в населе́ния** халыҡтың йәш буйынса составы

**ВОЗРОДИ́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан торғоҙоу, (яңынан) аяҡҡа баҫтырыу, яңыртыу, ҡайтарыу, тергеҙеү; **возроди́ть разру́шенное войно́й хозя́йство** һуғыш тарафынан емерелгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу; **возроди́ть бы́лую сла́ву** элекке данды кире ҡайтарыу

**ВОЗРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* (яңынан) тергеҙеү, яңынан аяҡҡа баҫыу, яңыртылыу, кире ҡайтыу; **наро́дное иску́сство возроди́лось** халыҡ сәнғәте тергеҙелде

**ВОЗРОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **возроди́ть**

**ВОЗРОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **возроди́ться 2.** *страд. от* **возрожда́ть**

**ВОЗРОЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** (яңынан) торғоҙоу, аяҡҡа баҫтырыу, тергеҙеү, яңыртылыу, кире ҡайтыу; **возрожде́ние разру́шенного хозя́йства** емерелгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу **2.** Яңырыу (*Европала урта быуаттарҙан һуң фән, мәҙәниәт, сәнғәт үҫеп киткән осор*); **эпо́ха Возрожде́ния** Яңырыу дәүере

**ВОЗРОПТА́ТЬ** *сов.*; *уст.* ризаһыҙлыҡ белдереү, һуҡраныу

**ВО́ЗЧИК** *м* ылаусы, йөксө

**ВОЗЫМЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** алыу, булыу; **возыме́ть власть** власть алыу **2.** тойоу, һиҙеү; **возыме́ть жела́ние** теләк барлығын тойоу ♦ **возыме́ть де́йствие** тәьҫир итеү, йоғонто яһау

**ВО́ИН** *м*; *высок.* һуғышсы, яугир; **до́блестный во́ин** батыр яугир

**ВО́ИНСКИЙ,** -ая, -ое хәрби, ғәскәри; **во́инский уста́в** хәрби устав; **во́инское зва́ние** хәрби дәрәжә

**ВОИ́НСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** һуғышсанлыҡ; **вои́нственность пле́мени** ҡәбиләнең һуғышсанлығы **2.** *перен.* этәслек, һуғышсан (булыу), һуғышып барыу; **вои́нственность хара́ктера** холоҡтоң этәслеге

**ВОИ́НСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** һуғышсан; **вои́нственные племена́** һуғышсан ҡәбиләләр **2.** *перен.* һуғышырға әҙер, сәркәш; **вои́нственный вид** һуғышырға әҙер торған ҡиәфәт

**ВО́ИНСТВО** *с*; *высок.* ғәскәр, сиреү

**ВОИ́НСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее һуғышсан, актив көрәшеүсән; **вои́нствующий материали́зм** һуғышсан материализм

**ВОИ́СТИНУ** *нареч.*; *высок.* ысын, ысынлап та, ысындан да, дөрөҫ; **вои́стину стра́нный челове́к** ысынлап та, сәйер кеше

**ВОЙ** *м* **1.** олоу; **соба́чий вой** эт олоуы **2.** *перен.* (*ветра*) олоу, ыжғырыу, һыҙғырыу; **вой ве́тра** ел ыжғырыуы **3.** *разг.* (*громкий, протяжный плач*) олоу, аҡырып илау; **де́ти по́дняли вой** балалар аҡырып илай башланы

**ВО́ЙЛОК** *м* кейеҙ, тула; **кусо́к во́йлока** кейеҙ киҫәге

**ВО́ЙЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кейеҙ ...ы; **во́йлочное произво́дство** кейеҙ етештереү **2.** кейеҙ, тула; **во́йлочные ту́фли** тула туфли; **во́йлочная шля́па** кейеҙ эшләпә

**ВОЙНА́** *ж* **1.** һуғыш; **Вели́кая Оте́чественная во́йна** Бөйөк Ватан һуғышы; **гражда́нская война́** граждандар һуғышы **2.** *перен.* көрәш, алыш, һуғыш; **война́ ме́жду па́ртиями** фирҡәләр араһындағы көрәш ♦ **холо́дная война́** һалҡын һуғыш

**ВО́ЙСКО** *с* ғәскәр; **регуля́рное во́йско** даими ғәскәр; **пограни́чные войска́** сик буйы ғәскәрҙәре

**ВОЙСКОВО́Й,** -ая, -ое ғәскәри; **войсковы́е ча́сти** ғәскәри частар

**ВОЙТИ́** *сов. во что* **1.** инеү, кереү; **войти́ в ко́мнату** бүлмәгә инеү; **войти́ в соста́в коми́ссии** комиссия составына инеү **2.** инеү, батыу; **зано́за вошла́ глубоко́ внутрь** шырау тәрәнгә инде; **лопа́та вошла́ в зе́млю** көрәк ергә батты **3.** (*вместиться*) һыйыу, һыйып бөтөү; **бельё не вошло́ в чемода́н** эске кейемдәр сумаҙанға һыйманы **4.** (*вникнуть*) төшөнөү, төшөнөп алыу, айышына төшөнөү, аңлау; **войти́ в суть де́ла** эштең айышына төшөнөү **5.** *офиц.-дел.* (*обратиться*) мөрәжәғәт итеү, инеү; **войти́ в дире́кцию с предложе́нием** дирекцияға тәкдим менән инеү ♦ **войти́ в быт** ғәҙәткә инеп китеү, ғәҙәтиләшеү; **войти́ в дове́рие** ышаныс ҡаҙаныу; **войти́ в долги́** бурысҡа инеү; **войти́ в жизнь**: 1) ғәҙәткә инеп китеү, танылыу; 2) тормошҡа өйрәнеү; **войти́ в исто́рию** тарихҡа инеү; **войти́ в колею́ (в ру́сло)** юлға һалыныу; **войти́ в положе́ние** *чьё* хәленә инеү, аңлау; **войти́ в роль** ролгә инеү, оҫтарып китеү; **войти́ в си́лу** көсөнә инеү; **войти́ в строй** сафҡа баҫыу

**ВОКА́БУЛА** *ж*; *лингв.* (*единица словаря*) вокабула, баш һүҙ

**ВОКАЛИ́ЗМ** *м*; *лингв.* вокализм, һуҙынҡылар системаһы

**ВОКАЛИ́СТ** *м* вокалсы, йырсы

**ВОКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** вокаль, йыр ...ы; **вока́льная му́зыка** вокаль музыка **2.** вокал; **вока́льное отделе́ние** вокал бүлеге

**ВОКЗА́Л** *м* вокзал; **железнодоро́жный вокза́л** тимер юл вокзалы; **речно́й вокза́л** йылға вокзалы

**ВОКЗА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое вокзал ...ы; **вокза́льное помеще́ние** вокзал бинаһы

**ВОКРУ́Г** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* тирә-яҡ, әйләнә-тирә; **огляну́ться вокру́г** тирә-яҡҡа күҙ ташлау, әйләнә-тирәгә ҡарау **2.** *предлог с род. п.* тирәһендә, әйләнәһендә, тирәләй, буйлап; **сесть вокру́г стола́** өҫтәл тирәһендә ултырыу; **путеше́ствие вокру́г све́та** донъя тирәләй сәйәхәт **3.** *предлог с род. п.* тирәләй, ҡағылышлы; **спо́ры вокру́г поли́тики** сәйәсәткә ҡағылышлы бәхәстәр

♦ **вокру́г да о́коло** *см.* **о́коло**; **вокру́г па́льца обвести́** төп башына ултыртыу, кәкре ҡайынға терәтеү

**ВОЛ** *м* екке үгеҙ, эш үгеҙе ♦ **рабо́тать (труди́ться) как вол** үгеҙ (ат) кеүек эшләү

**ВОЛА́Н** *м* **1.** волан, бала итәк, ҡатмар, мәскәү **2.** *спорт.* волан

**ВОЛДЫ́РЬ** *м* күпертке

**ВОЛЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** ихтыяр ...ы; **волево́й и́мпульс** ихтыяр импульсы **2.** ихтыярлы, ныҡ ихтыярлы; **волево́й челове́к** ныҡ ихтыярлы кеше; **волево́е лицо́** ихтыярлы йөҙ

**ВОЛЕИЗЪЯВЛЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* ихтыяр (теләк) белдереү; **свобо́дное волеизъявле́ние наро́да** халыҡтың үҙ ихтыярын белдереүе

**ВОЛЕЙБО́Л** *м* волейбол; **игра́ть в волейбо́л** волейбол уйнау

**ВОЛЕЙБОЛИ́СТ** *м* и **ВОЛЕЙБОЛИ́СТКА** *ж* волейболсы

**ВОЛЕЙБО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое волейбол ...ы; **волейбо́льный мяч** волейбол тубы

**ВО́ЛЕЙ-НЕВО́ЛЕЙ** *нареч.* теләһәң-теләмәһәң дә, сараһыҙҙан; **во́лей-нево́лей согласи́ться** теләһәң-теләмәһәң дә риза булыу

**ВОЛК** *м* бүре; **волчи́ца** *ж* инә бүре; **се́рый волк** күк бүре ♦ **морско́й волк** *перен.* тәжрибәле моряк; **волк в ове́чьей шку́ре** һарыҡ тиреһе ябынған бүре (*ике йөҙлө, мәкерле кеше тураһында*); **во́лком смотре́ть** бүре кеүек ҡарау; **хоть во́лком вой** әсе зарланыу, башыңды ташҡа бәрһәң дә; **с волка́ми жить — по во́лчьи выть** кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың

**ВОЛКОДА́В** *м* бүре эте, бүре тотар эт

**ВОЛНА́** *ж*; *в разн. знач.* тулҡын; **морска́я волна́** диңгеҙ тулҡыны; **возду́шная волна́** һауа тулҡыны; **звукова́я волна́** *физ.* тауыш тулҡыны; **волна́ патриоти́ческого движе́ния** патриотик хәрәкәт тулҡыны

**ВОЛНЕ́НИЕ** *с* **1.** (*движение волн*) тулҡынланыу; **волне́ние мо́ря** диңгеҙ тулҡынланыуы **2.** (*нервное возбуждение*) тулҡынланыу, борсолоу, тынысһыҙланыу; **жизнь полна́ трево́г и волне́ний** тормош шом һәм борсолоуҙар менән тулы **3.** *обычно мн.* **волне́ния**; *перен.* сыуалыш; **волне́ния наро́дных масс** халыҡ массаларының сыуалышы

**ВОЛНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** тулҡынланып торған, тулҡынлы; **волни́стые во́лосы** тулҡынланып торған сәс **2.** убалы-түбәле; **волни́стая ме́стность** убалы-түбәле ер

**ВОЛНОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* тулҡынландырыу; **ве́тер волну́ет мо́ре** ел диңгеҙҙе тулҡынландыра **2.** *кого-что* тулҡынландырыу, борсоу, тынысһыҙлау; **отсу́тствие пи́сем меня́ волну́ет** миңә хат килмәү борсой

**ВОЛНОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тулҡынланыу; **мо́ре волну́ется** диңгеҙ тулҡынлана **2.** тулҡынланыу, борсолоу, тынысһыҙланыу; **наро́д волну́ется** халыҡ тынысһыҙлана

**ВОЛНОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *физ.* тулҡын ...ы; **волнова́я тео́рия све́та** яҡтылыҡтың тулҡын теорияһы **2.** *трад.-поэт.* ел-дауыллы, тулҡын күтәргес; **волнова́я пого́да** ел-дауыллы һауа торошо

**ВОЛНОЛО́М** *м* тулҡын тотҡос (ҡайтарғыс) (*нығытма*)

**ВОЛНООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тулҡын кеүек (һымаҡ); **волнообра́зные движе́ния** тулҡын һымаҡ хәрәкәттәр **2.** убалы-түбәле; **волнообра́зные холмы́** убалы-түбәле ҡалҡыулыҡтар

**ВОЛНОРЕ́З** *м см.* **волноло́м**

**ВОЛНУ́ШКА** *ж* йөнтәҫ бәшмәк

**ВОЛНУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **волнова́ть 2.** *прил.* тулҡынландырғыс; **волну́ющее собы́тие** тулҡынландырғыс ваҡиға

**ВОЛО́ВИЙ,** -ья, -ье **1.** үгеҙ ...ы; **воло́вья шку́ра** үгеҙ тиреһе; **воло́вье ста́до** үгеҙ көтөүе **2.** *перен., разг.* ныҡ, көслө; **воло́вье здоро́вье** ныҡлы сәләмәтлек ♦ **воло́вьи глаза́** үгеҙ күҙле; **воло́вья ше́я** ҡыҫҡа муйын, үгеҙ муйын

**ВОЛО́ВИНА** *ж* үгеҙ тиреһе

**ВОЛО́ВНЯ** *ж* үгеҙ һарайы

**ВО́ЛОК** *м* волок, һөйрәмә ер (*бер йылғаның икенсеһенә яҡын килгән урынынан кәмәне, пароходты һөйрәп төшөрә торған ер*)

**ВОЛОКИ́ТА I** *ж* волокита; **бюрократи́ческая волоки́та** бюрократик волокита

**ВОЛОКИ́ТА II** *м*; *разг., уст.* шырмый (*ҡатын-ҡыҙ тирәһендә уралған ир*)

**ВОЛОКНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое сүсле; **волокни́стые вещества́** сүсле матдәләр; **волокни́стые расте́ния** сүсле үҫемлектәр

**ВОЛОКНО́** *с* **1.** сүс; **шёлковое волокно́** ебәк сүс **2.** *обычно мн.* **воло́кна**; *биол.* ептәр (епсәләр); **не́рвные воло́кна** нерв епсәләре

**ВО́ЛОКОМ** *нареч.* һөйрәп, һөйрәтеп; **тащи́ть ло́дку во́локом** кәмәне һөйрәтеп алып барыу

**ВОЛОКУ́ША** *ж* һөйрәтке, һөйрәткес

**ВОЛОНТЁР** *м*; *уст.* волонтёр (*ирекле ғәскәри хеҙмәткәр*)

**ВОЛОО́КИЙ,** -ая, -ое ҙур күҙле, аҡыш күҙле

**ВО́ЛОС** *м* **1.** сәс, сәс бөртөгө (*кешелә*); **седо́й во́лос** сал сәс **2.** *собир.* ҡыл (*ат һәм һыйыр ҡойроғонда*), йөн (*кеше, ҡош-ҡорт һәм хайуандар тәнендә*), төк (*кеше, хайуан тәнендә*), шырт (*кеше һәм ҡайһы бер хайуанда*); **ко́нский во́лос** ат ҡылы ♦ **ни на́ волос** саҡ ҡына ла, аҙ ғына ла, һис тә, бер ҙә; **во́лосы ста́ли (подня́лись) ды́бом** сәстәр үрә торҙо; **рвать (драть) на себе́ во́лосы** сәсте йолҡоу, ныҡ үкенеү; **до седы́х воло́с** ҡартайғансы

**ВОЛОСА́ТИК** *м* ҡылйылан, ҡылселәүсен

**ВОЛОСА́ТЫЙ,** -ая, -ое сәсле, йөнлө, йөнтәҫ; **волоса́тая грудь** йөнтәҫ түш

**ВОЛОСИ́НКА** *ж* бер бөртөк сәс, сәс бөртөгө (*ҡыҫҡа, нәҙек*)

**ВОЛОСНО́Й,** -ая, -ое сәс keүек нәҙек, бик нәҙек

**ВОЛОСО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **во́лос** **2.** *бот.* төксә **3.** бик нескә ҡыл; **волосо́к в часово́м механи́зме** сәғәт механизмындағы нескә ҡыл ♦ **на волосо́к (на волоске́) быть (находи́ться)** *от чего* ҡыл өҫтөндә, саҡ-саҡ булыу; **висе́ть на волоске́** ҡыл өҫтөндә тороу; **не тро́нуть волоска́** *у кого* тырнаҡ менән дә теймәү

**ВОЛОСТНО́Й,** -ая, -ое *ист.* улус (волость) ...ы; **волостно́е правле́ние** улус (волость) идараһы

**ВО́ЛОСТЬ** *ж*; *ист.* улус (волость)

**ВОЛОСЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** төк ...ы, йөн ...ы, сәс ...ы; **волосяно́й покро́в** төк (йөн) менән ҡапланған **2.** ҡыл, ҡылдан яһалған; **волосяно́й матра́ц** ҡыл түшәк

**ВОЛОЧИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* һөйрәү, һөйрәтеү; **волочи́ть мешо́к** тоҡто һөйрәү **2.** *что*; *тех.* ҡыҫып нәҙегәйтеү; **волочи́ть про́волоку** тимер сыбыҡты ҡыҫып нәҙегәйтеү ♦ **е́ле (едва́) но́ги волочи́ть** аяҡты саҡ һөйрәтеп атлау

**ВОЛОЧИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һөйрәлеү, һөйрәлеп барыу; **во́жжи волочи́лись по земле́** дилбегә ерҙән һөйрәлеп бара ине **2.** яй ғына, көскә барыу (атлау) **3.** *за кем*; *разг.*, *уст.* ҡатын-ҡыҙ артынан йөрөү **4.** *страд. от* **волочи́ть**

**ВОЛО́ЧЬ** *несов.*; *разг. см.* **волочи́ть** 1; **де́ти волокли́ теле́жку** балалар ҡул арбаһын һөйрәп бара ине

**ВОЛО́ЧЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **волочи́ться** 1

**ВОЛХВ** *м* сихырсы, күҙ быуыусы (*боронғо славяндарҙа*)

**ВОЛЧА́НКА** *ж*; *мед.* сөсө, сөсө ауырыуы

**ВОЛЧА́ТНИК** *м*; *разг.* бүре аусыһы (аулаусы)

**ВОЛЧЕ́Ц** *м* (*сорные травы*) билсән, шайтан таяғы

**ВО́ЛЧИЙ,** -ья, -ье **1.** бүре ...ы; **во́лчья шку́ра** бүре тиреһе; **во́лчья ста́я** бүре өйөрө **2.** бүре тиреһенән тегелгән (яһалған); **во́лчья шу́ба** бүре тиреһенән тегелгән тун **3.** *перен.* бүре ...ы, йыртҡыс ...ы, бүреләрсә, йыртҡыстарса; **во́лчьи зако́ны** бүреләр законы; **во́лчьи отноше́ния** бүреләрсә ҡараш ♦ **во́лчий аппети́т** яҡшы аппетит; **во́лчий биле́т (па́спорт)** кәзә билеты; **во́лчья я́года** бүре емеше (сейәһе); **во́лчья я́ма** *охот.* бүре баҙы (соҡоро)

**ВОЛЧИ́ХА** *ж*; *прост. см.* **волк**

**ВОЛЧКО́М: верте́ться волчко́м**: 1) зыр әйләнеү; 2) йүгереп йөрөп эшләү

**ВОЛЧО́К** *м* өйөрсөк, зырылдауыҡ (*балалар уйынсығы*)

**ВОЛЧО́НОК** *м* бүре балаһы

**ВОЛШЕ́БНИК** *м* и **ВОЛШЕ́БНИЦА** *ж* тылсымсы, сихырсы, күрәҙәсе

**ВОЛШЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тылсым ...ы, тылсымлы; **волше́бная па́лочка** тылсым таяғы; **волше́бная ска́зка** тылсымлы әкиәт **2.** *перен.* сихри, һоҡландырғыс, мөғжизәле; **волше́бный лес** сихри урман

**ВОЛШЕБСТВО́** *с* тылсым; **как бу́дто по волшебству́** әйтерһең дә, тылсым буйынса

**ВОЛЫ́НИТЬ** *несов.*; *разг.* юрый яйлап эшләү, әкрен ҡыймылдау, һуҙмаҡайлау

**ВОЛЫ́НКА** *ж* **1.** *муз.* ҡыуыҡлы һорнай **2.** *разг.* аҡрынлыҡ, һүлпәнлек **3.** (*затяжное дело*) мәшәҡәтле эш

**ВОЛЫ́НЩИК** *м* һорнайсы

**ВОЛЬГО́ТНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* иркен, рәхәт; **вольго́тное житьё** рәхәт тормош

**ВОЛЬЕ́Р** *м* и **ВОЛЬЕ́РА** *ж* вольер (*ҡош һәм хайуандарҙы аҫрау өсөн кәртәләнгән майҙан*)

**ВО́ЛЬНАЯ** *ж*; *ист.* ирекле документы (*крепостнойлыҡтан азат итеү тураһында*)

**ВО́ЛЬНИЦА** **1.** *ж собир.* ҡасаҡтар; **каза́чья во́льница** казак ҡасаҡтары **2.** *м* и *ж*; *разг.* баш-баштаҡ кеше (*күберәк, бала тураһында*)

**ВО́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* баш-баштаҡланыу, баш-баштаҡлыҡ итеү, теләгәнен эшләү

**ВО́ЛЬНО** *нареч.* ирекле, иркен; **ды́шится во́льно** тын алыуы иркен ♦ **во́льно**! *воен.*, *спорт.* вольно! (*команда*); **во́льно или нево́льно** ирекһеҙҙән, теләһәң-теләмәһәң

**ВОЛЬНО́** *в знач. сказ.*, *с неопр.*; *разг.* үҙе ғәйепле, үҙенә үпкәләһен, уға кем ҡушҡан; **вольно́ ему́ бы́ло не слу́шаться никого́** бер кемде лә тыңламаҫҡа уға кем ҡушҡан

**ВОЛЬНОДУ́МЕЦ** *м*; *уст.* хөр фекерле кеше

**ВОЛЬНОДУ́МНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* хөр фекерле, хөр фекер менән һуғарылған; **вольноду́мные стихи́** хөр фекерле шиғырҙар

**ВОЛЬНОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое азатлыҡ (хөрлөк) яратыусы, ирек һөйөүсән, ирекка ынтылыусы; **вольнолюби́вый наро́д** азатлыҡ яратыусы халыҡ

**ВОЛЬНОНАЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (үҙе теләп) ялланған, (ихтыяри, ирекле) ялланған; **вольнонаёмный труд** ялланған хеҙмәт **2.** *воен.* ялланған ғәскәри хеҙмәткәр

**ВОЛЬНООПРЕДЕЛЯ́ЮЩИЙСЯ** *м* ирекле хәрби хеҙмәткәр

**ВОЛЬНООТПУ́ЩЕННИК** *м*; *ист.* ирекка ебәрелгән кеше (*ҡол йәки крепостной*)

**ВОЛЬНООТПУ́ЩЕННЫЙ,** -ая, -ое *ист.* ирекка ебәрелгән, азат ителгән (*ҡол йәки крепостной*)

**ВОЛЬНОСЛУ́ШАТЕЛЬ** *м* и **ВОЛЬНОСЛУ́ШАТЕЛЬНИЦА** *ж* ирекле тыңлаусы (*вуздарҙа*)

**ВО́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** *уст.* азатлыҡ, ирeклек, бойондороҡһоҙлоҡ **2.** (*развязность*) тыйнаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, тәртипһеҙлек; **позволя́ть себе́ во́льности** әҙәпһеҙ ҡыланыу, тыйнаҡһыҙлыҡ ебәреү **3.** ирeклек; **поэти́ческая во́льность** шиғри ирeклек

**ВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** азат, ирекле, бойондороҡһоҙ; **во́льный челове́к** ирекле кеше **2.** иркен; **во́льная жизнь** иркен тормош **3.** (*свободолюбивый*) хөр, азатлыҡ ...ы; **во́льные мы́сли** хөр фекерҙәр; **во́льные иде́и** азатлыҡ идеялары **4.** *только кратк. ф.*, *с неопр.* или *в чём* ихтыярлы, ирекле; **он во́лен поступа́ть по-сво́ему** ул үҙенсә эшләргә ихтыярлы, уйларға ирекле **5.** (*несдержанный*) тыйнаҡһыҙ, әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ; **во́льная шу́тка** әҙәпһеҙ шаярыу **6.** (*не стеснённый законами*) сикләүһеҙ, ирекле; **во́льная прода́жа хле́ба** икмәкте сикләүһеҙ һатыу; **по во́льным це́нам** ирекле хаҡ менән ♦ **во́льная пти́ца** ирекле ҡош (*азат кеше*); **во́льные упражне́ния** *спорт.* ирекле күнекмәләр; **во́льный го́род** *ист.* ирекле ҡала (*үҙ аллы ҡала-дәүләт*); **во́льный каза́к** ирекле казак (*үҙ ерендәге кеше*); **во́льный перево́д** ирекле тәржемә; **во́льный стих** ирекле шиғыр; **на во́льном во́здухе** саф һауала

**ВО́ЛЬТ** *м*; *эл.* вольт

**ВО́ЛЬТА** *ж* вольта (*туҡыма*)

**ВОЛЬТМЕ́ТР** *м*; *эл.* вольтметр

**ВОЛЬФРА́М** *м* вольфрам (*химик элемент, металл*)

**ВОЛЬФРА́МОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** вольфрам ...ы; **вольфра́мовая спира́ль** вольфрам спираль **2.** вольфрамлы; **вольфра́мовые со́ли** вольфрамлы тоҙ(ҙар)

**ВОЛЮНТАРИ́ЗМ** *м* **1.** *филос.* волюнтаризм **2.** *псих.* волюнтарсылыҡ (*ихтыяр көсөнә генә таянып эш итеү*)

**ВОЛЮНТАРИ́СТ** *м* волюнтарсы

**ВОЛЮНТАРИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *филос.* волюнтаризм ...ы, волюнтаристик; **волюнтаристи́ческая тео́рия** волюнтаризм теорияһы **2.** волюнтарсылыҡ ...ы, волюнтарсыларса ...ы; **волюнтаристи́ческий подхо́д** волюнтарсыларса мөнәсәбәт

**ВО́ЛЯ** *ж* **1.** ихтыяр; **си́ла во́ли** ихтыяр көсө; **воспита́ть во́лю** ихтыяр тәрбиәләү **2.** (*стремление*) ынтылыш; **во́ля к побе́де** еңеүгә ынтылыш **3.** (*желание*) теләк, талап; **испо́лнить во́лю** *чьюл. кемдеңдер* теләген үтәү **4.** (*право*) хоҡуҡ, ирек; **дать во́лю** ирек биреү **5.** (*свобода*) ирек, азатлыҡ; **вы́рваться на во́лю** ирекккә сығыу ♦ **во́ля ва́ша (твоя́)** ихтыярығыҙ (ихтыярың), мәйелегеҙ (мәйелең); **во́лею су́деб** яҙмыш ҡушыуы буйынса; **на во́лю** саф һауаға, тышҡа; **на во́ле** *прост.* тышта, саф һауала; **дать во́лю** ирек биреү (ҡуйыу); **дать во́лю рука́м** ҡулға ирек биреү (*һуғышыу*); **лю́ди до́брой во́ли** тыныслыҡҡа ынтылған кешеләр; **по до́брой во́ле** үҙ теләге менән

**ВОН I** *нареч.*; *разг.* **1.** тышҡа, ситкә; **вы́йти вон** тышҡа сығыу **2.** *в знач. межд.* (сығып) кит, ысҡын; **вон отсю́да!** сығып кит бынан!

**ВОН II** *частица*; *разг.* ана, бына; **вон где** бына ҡайҙа; **вон там** ана тегендә ♦ **вон (оно́) что**; **вон (оно́) как** бына нимә, бына нисек

**ВОНЗА́ТЬ** *несов. см.* **вонзи́ть**

**ВОНЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вонзи́ться** **2.** *страд. от* **вонза́ть**

**ВОНЗИ́ТЬ** *сов. что* **1.** сәнсеү, ҡаҙау, батырыу; **вонзи́ть нож** бысаҡ сәнсеү; **вонзи́ть ко́гти** тырнаҡ батырыу **2.** *перен.* төбәү, текәү (*үтә сәнсеп ҡарау*); **вонзи́ть взгляд** ҡарашты текәү

**ВОНЗИ́ТЬСЯ** *сов.* сәнселеү, ҡаҙалыу, батырылыу; **о́стрый шип вонзи́лся в но́гу** осло шырау аяҡҡа ҡаҙалды

**ВОНЬ** *ж*; *разг.* һаҫыҡ еҫ

**ВОНЮ́ЧИЙ,** -ая, -ее *разг.* һаҫыҡ, һаҫыҡ еҫле

**ВОНЮ́ЧКА** *ж* көҙән

**ВОНЯ́ТЬ** *несов.*; *разг.* һаҫытыу, һаҫыҡ еҫ сығарыу; **воня́ет гни́лью** серек еҫе сыға

**ВООБРАЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вообража́ть** күҙ алдына килтерелгән, уйланылған **2.** *прил.* (*мнимый*) хыялдағы, уйҙағы, фараз ителгән; **вообража́емые тру́дности** уйҙағы ҡыйынлыҡтар

**ВООБРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **вообрази́ть** ♦ **вообража́ть о себе́** *прост.* үҙен әллә кемгә ҡуйыу

**ВООБРАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** күҙ алдына килтереү, күҙаллау; **восстанови́ть в воображе́нии** ниҙелер күҙ алдына килтереү **2.** хыял; **тво́рческое воображе́ние** ижади хыял **3.** *разг.* (*домысел*) фараз; **э́то плод его́ воображе́ния** был уның фаразы емеше

**ВООБРАЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*мысленно представить*) күҙ алдына килтереү, күҙаллау, кәүҙәләндереү; **вообрази́те на мину́тку** бер минутҡа күҙ алдына килтерегеҙ **2.** *что* (*предположить*) тип уйлау (хис итеү, фараз итеү); **вообрази́л себя́ поэ́том** үҙен шағир тип хис итте **3.** *повел.* **вообрази́(те)** уйлап ҡара(ғыҙ), күҙ алдына килтер(егеҙ)

**ВООБЩЕ́** *нареч.* **1.** ғөмүмән, ғөмүмән алғанда; **вообще́, вы пра́вы** ғөмүмән, һеҙ хаҡлы **2.** (*всегда*) гел, һәр ваҡыт; **он вообще́ весёлый тако́й** ул һәр ваҡыт шулай күңелле **3.** (*совсем*) бөтөнләй; **больно́й мно́гих вообще́ не узнаёт** ауырыу күптәрҙе бөтөнләй танымай ♦ **вообще́ говоря́** *в знач. вводн. сл.* ғөмүмән, ғөмүмән алғанда

**ВООДУШЕВИ́ТЬ** *сов. кого-что* рухландырыу, дәртләндереү, ҡанатландырыу, илһам биреү; **воодушеви́ть на по́двиг** батырлыҡҡа рухландырыу

**ВООДУШЕВИ́ТЬСЯ** *сов.* рухланыу, дәртләнеү, ҡанатланыу, илһамланыу

**ВООДУШЕВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **воодушеви́ть** рухланыу, дәртләнеү, илһамланыу **2.** күтәренке рух, дәрт, илһам; **с воодушевле́нием говори́ть** илһам менән һөйләү

**ВООДУШЕВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **воодушеви́ть**

**ВООДУШЕВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воодушеви́ться** **2.** *страд. от* **воодушевля́ть**

**ВООРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **вооружи́ть**

**ВООРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вооружи́ться 2.** *страд. от* **вооружа́ть**

**ВООРУЖЕ́НИЕ** *с* **1.** ҡоралландырыу, ҡоралланыу; **вооруже́ние а́рмии** армияны ҡоралландырыу **2.** ҡорал; **сокраще́ние вооруже́ний** ҡоралдарҙы кәметеү **3.** йыһаз, ҡорал-ҡорамал, кәрәк-яраҡ; **па́русное вооруже́ние корабля́** караптың парус кәрәк-ярағы

**ВООРУЖЁННОСТЬ** *ж* ҡоралланғанлыҡ, ҡоралланған булыу, (ҡорал менән) тәьмин ителеү; **техни́ческая вооружённость се́льского хозя́йства** ауыл хужалығының техник яҡтан тәьмин ителеүе

**ВООРУЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вооружи́ть**; **вооружённый те́хникой** техника менән ҡоралланған **2.** *прил.* ҡоралы; **вооружённый отря́д** ҡоралы отряд **3.** *прил.* (*производимый с оружием в руках*) ҡоралы, ҡорал менән; **вооружённое восста́ние** ҡоралы ихтилал; **вооружённое нападе́ние** ҡоралы һөжүм ♦ **вооружённым гла́зом** оптик прибор аша (ҡарау); **вооружённые си́лы** ҡоралы көстәр

**ВООРУЖИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡоралландырыу, ҡорал менән тәьмин итеү; **вооружи́ть а́рмию** армияны ҡоралландырыу **2.** *чем* (*снабдить орудиями, материалами*) ҡоралландырыу, йыһазландырыу, тәьмин итеү; **вооружи́ть промы́шленность но́вой те́хникой** сәнәғәтте яңы техника менән тәьмин итеү **3.** *перен.* (*настроить против кого-чего-л.*) ҡаршы ҡотортоу, ҡаршы ҡуйыу, дошманлаштырыу; **вооружи́ть про́тив себя́** үҙеңә ҡаршы ҡуйыу

**ВООРУЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡоралланыу, ҡорал менән тәьмин ителеү; **вооружи́ться до зубо́в** баштан-аяҡ ҡоралланыу **2.** ҡоралландырылыу, ҡорал итеп алыу; **вооружи́ться но́вой те́хникой** яңы техника менән ҡоралландырылыу **3.** *перен.* (*приобрести какие-л. знания*) ҡоралланыу; **вооружи́ться передово́й тео́рией** алдынғы теория менән ҡоралланыу **4.** *против кого-чего*; *перен.* (*восстать, ополчиться*) ҡаршы тороу, ҡаршы сығыу, ҡаршы булыу ♦ **вооружи́ться терпе́нием** түҙемле булырға тырышыу

**ВОО́ЧИЮ** *нареч.* **1.** үҙ күҙе менән, үҙе күреп, үҙе һынап; **убеди́ться воо́чию** үҙ күҙең менән күреп ышаныу **2.** (*наглядно*) асыҡ, асыҡ рәүештә; **воо́чию представля́ть** асыҡ күрһәтеү

**ВО-ПЕ́РВЫХ** *вводн. сл.* беренсенән; **во-пе́рвых, пого́да испо́ртилась** беренсенән, көн боҙолдо

**ВОПИ́ТЬ** *несов.* **1.** *разг.* аҡырыу, баҡырыу, үкереү **2.** *прост.* (*причитать, громко плакать*) һөйләнеп илау, ҡысҡырып илау, сыуылдау

**ВОПИЮ́ЩИЙ,** -ая, -ее күҙгә бәрелеп торған, аптырарлыҡ, иҫ китерлек; **вопию́щий факт** күҙгә бәрелеп торған факт; **вопию́щие оши́бки** күҙгә бәрелеп торған хаталар

**ВОПЛОТИ́ТЬ** *сов. кого-что* (*выразить в конкретной форме*) кәүҙәләндереү, сағылдырыу, ашырыу; **воплоти́ть иде́ю в произведе́ниях** әҫәрҙәрҙә идеяны кәүҙәләндереү ♦ **воплоти́ть в себе́** үҙеңдә кәүҙәләндереү; **воплоти́ть в жизнь** тормошҡа ашырыу

**ВОПЛОТИ́ТЬСЯ** *сов.* кәүҙәләнеү, сағылыу, ашырылыу, ашыу

**ВОПЛОЩА́ТЬ** *несов. см.* **воплоти́ть**

**ВОПЛОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воплоти́ться 2.** *страд. от* **воплоща́ть**

**ВОПЛОЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **воплоти́ть**, **воплоти́ться 2.** кәүҙәләнеш; **найти́ своё воплоще́ние** үҙенең кәүҙәләнешен табыу

**ВОПЛОЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **воплоти́ть 2.** *прил.* камил, тап үҙе; **воплощённая че́стность** камил намыҫлылыҡ

**ВОПЛЬ** *м* ҡысҡырған (үкергән) тауыш, (әсе) ауаз; **вопль отча́яния** өмөтһөҙлөк ауазы

**ВОПРЕКИ́** *предлог с дат. п.* -ға/-гә ҡарамаҫтан, -ға/-гә ҡаршы; **вопреки́ моему́ жела́нию** теләгемә ҡаршы; **вопреки́ прика́зу** приказ булыуға ҡарамаҫтан

**ВОПРО́С** *м* **1.** һорау; **задава́ть вопро́с** һорау биреү; **осажда́ть вопро́сами** һорауҙар менән күмеп ташлау **2.** (*проблема*) мәсьәлә; **национа́льный вопро́с** милли мәсьәлә; **жили́щный вопро́с** торлаҡ мәсьәләһе; **поста́вить вопро́с на обсужде́ние** мәсьәләне тикшереүгә ҡуйыу; **оста́вить вопро́с откры́тым** мәсьәләне асыҡ ҡалдырыу **3.** *разг.* (*дело, обстоятельство*) эш, хәл, мөһим эш; **э́тот вопро́с меня́ беспоко́ит** был хәл мине борсой ♦ **больно́й вопро́с** хәл итеүе ауыр мәсьәлә; **откры́тый вопро́с** хәл ителмәгән мәсьәлә; **под (больши́м) вопро́сом (быть, остава́ться)** хәл ителмәгән, икеле мәсьәлә; **ста́вить под вопро́с** шикле һанау, кәрәкле һанамау; **что за вопро́с** эйе, әлбиттә (*аптырағанда йә риза булғанда әйтелә*); **поста́вить вопро́с ребро́м** мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйыу; **вопро́с жи́зни и́ли сме́рти** сиктән тыш мөһим мәсьәлә, үлем йә йәшәү менән бер

**ВОПРОСИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һорау, һораулы; **вопроси́тельный взгляд** һораулы ҡараш **2.** *грам.* һорау ...ы; **вопроси́тельный знак** һорау билдәһе; **вопроси́тельное предложе́ние** һорау һөйләм

**ВОПРО́СНИК** *м* һораулыҡ; **соста́вить вопро́сник** һораулыҡ төҙөү

**ВОПРО́СНЫЙ,** -ая, -ое һорау ...ы; **вопро́сный лист** һорау ҡағыҙы

**ВОР** *м* и **ВОРО́ВКА** *ж* ҡараҡ, бур, уғры

**ВОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** атылып килеп инеү, баҫып барып инеү; **ворва́ться в око́пы проти́вника** дошмандың окоптарына баҫып барып инеү **2.** *перен.* (тиҙ генә) килеп (инеп) тулыу, тиҙ генә килеп инеү (*тауыш, еҫ*); **за́пах сире́ни ворва́лся в дом** сирень еҫе өйгә инеп тулды

**ВОРИ́ШКА** *м*; *уменьш.-уничиж. от* **вор** кеҫә ҡарағы, ваҡ-төйәк урлаусы

**ВОРКОВА́НЬЕ** *с* гөрләшеү, гөрләү; **воркова́нье голубе́й** күгәрсендәр гөрләүе

**ВОРКОВА́ТЬ** *несов.* **1.** (*о голубях*) гөрләшеү, гөрләү **2.** *перен.*, *шутл.*, *ирон.* сөкөрләшеү, гөрләшеү, серләшеү

**ВОРКОТНЯ́** *ж*; *разг.* һуҡраныу, мығырлау

**ВОРОБЕ́Й** *м* турғай; **воробьи́ха** *ж*; *разг.* инә турғай; **гнездо́ воробья́** турғай ояһы ♦ **стре́ляный воробе́й** күпте күргән кеше, утты-һыуҙы кискән

**ВОРОБЕ́ЙНИК** *м* турғай еләге

**ВОРОБЬИ́НЫЙ,** -ая, -ое турғай ...ы; **воробьи́ный клюв** турғай суҡышы ♦ **воробьи́ная ночь**: 1) бер туҡтауһыҙ йәшен йәшнәгән йәки һаҙағайлы төн; 2) йәйҙең иң ҡыҫҡа төнө; **коро́че воробьи́ного но́са** бик ҡыҫҡа (*ҡыҫҡалығына баҫым яһағанда әйтелә*)

**ВОРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое урланған, урлап алынған; **воро́ванные ве́щи** урланған әйберҙәр

**ВОРОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәйләкәр, хәйләле, мут; **вороватый взгляд** хәйләкәр ҡараш **2.** һаҡ, ҡурҡаҡ, шикләнеүсән, хәүефләнеүсән; **борова́тая похо́дка** һаҡ ҡына атлап йөрөү

**ВОРОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* урлау, сәлдереү; **борова́ть зерно́** ашлыҡ урлау **2.** (*заниматься воровством*) урлашыу, уғрылыҡ менән шөғөлләнеү

**ВОРОВСКИ́** *нареч.*; *разг.* ҡараҡтарса, йәшерен (аҫтыртын) рәүештә; **воровски́ озира́ться по сторона́м** тирә-яҡҡа йәшерен рәүештә ҡараныу

**ВОРОВСКО́Й,** -ая, -ое ҡараҡ(тар) ...ы; **воровски́е дела́** ҡараҡтар эше; **воровска́я ша́йка** ҡараҡтар шайкаһы ♦ **воровско́й язы́к** (*жаргон*) бурҙар теле (*йәшерен тел*)

**ВОРОВСТВО́** *с* бурлыҡ, ҡараҡлыҡ, уғрылыҡ, урлашыу ♦ **литерату́рное воровство́** әҙәби ҡараҡлыҡ, плагиат

**ВО́РОГ** *м*; *уст.* дошман

**ВОРОЖБА́** *ж* күрәҙәлек итеү, фал асыу, ноҡот (кәрт) һалыу, бағымсылыҡ

**ВОРОЖЕ́Я** *ж* күрәҙәсе, фалсы, фал асыусы, ноҡот һалыусы, бағымсы

**ВОРОЖИ́ТЬ** *несов.* **1.** (*гадать*) күрәҙәлек итеү, фал асыу, ноҡот һалыу **2.** (*колдовство*) сихырлау

**ВО́РОН** *м* ҡоҙғон ♦ **куда́ во́рон косте́й не занесёт** ер аяғы ер башы, ер сиге

**ВОРО́НА** *ж* **1.** ҡарға, ала ҡарға, ҡара ҡарға **2.** *разг.* (*разиня*) асыҡ ауыҙ ♦ **бе́лая воро́на** аҡ ҡарға (*башҡаларҙан ныҡ айырылып тороуға ҡарата*); **воро́на в павли́ньих пе́рьях** һалам-торхан; **пу́ганая воро́на куста́ бои́тся** ҡурҡҡанға ҡуш күренә; **счита́ть воро́н** ауыҙ асып тороу

**ВОРОНЁНОК** *м* бала ҡарға

**ВОРОНЁНЫЙ,** -ая, -ое ҡарайтылған, ялтыр ҡара, оксидлашҡан (*ҡорос йөҙө тураһында*); **воронёная сталь** ҡарайтылған ҡорос

**ВОРОНЕ́Ц** *м* бәғәнәт, көртбаҫар

**ВОРО́НИЙ,** -ья, -ье ҡарға ...ы, ала ҡарға ...ы, ҡара ҡарға ...ы; **воро́нье крыло́** ҡарға ҡанаты

**ВОРО́НИТЬ** *несов.*; *прост.* мыштыр булыу, асыҡ ауыҙ булыу

**ВОРОНИ́ТЬ** *несов. что* ҡарайтыу, ялтыр ҡара итеү, ҡара яғыу (*металға*), оксидлаштырыу (*ҡорос йөҙөн*); **ворони́ть сталь** ҡорос ҡарайтыу

**ВОРО́НКА** *ж* **1.** (*для переливания*) буранка **2.** (*от снаряда*) соҡор

**ВОРОНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*о масти лошади*) ҡара; **вороно́й конь** ҡара ат **2.** *в знач. сущ.* **вороно́й** *м* ат (*ҡара төҫтәге*)

**ВОРОНЬЁ** *с собир.* **1.** ҡарғалар көтөүе, ҡарғалар **2.** *прост.*, *презр.* өҙгөстәр (*өҙөп-йолҡоп, талап торған кешеләр*)

**ВО́РОТ I** *м* (*одежды*) яға, яға уйынтыһы; **широ́кий во́рот** киң яға; **вы́резать во́рот** яға уйыу ♦ **схвати́ть (держа́ть) за́ ворот** яғанан алыу

**ВО́РОТ II** *м*; *тех.* сығыр; **коло́дезный во́рот** ҡоҙоҡ сығыры

**ВОРО́ТА** *мн.* ҡапҡа; **желе́зные воро́та** тимер ҡапҡа; **отвори́ть воро́та** ҡапҡа асыу

**ВОРОТИ́ЛА** *м*; *разг.* (*делец*) ҙур эштәр атҡарыусы, эшҡыуар

**ВОРОТИ́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.* (*вернуть*) бороп ҡайтарыу, кире ҡайтарыу

**ВОРОТИ́ТЬ II** *несов.*; *прост.* **1.** ситкә бороу, артҡа бороу; **вороти́ть го́лову** башты елдән артҡа бороу **2.** (*управлять большими делами*) эш итеү, эш башҡарыу; **купе́ц вороти́л миллио́нами** сауҙагәр миллиондар менән эш итте ♦ **вороти́ть нос (мо́рду, ры́ло)** *от кого-чего*; *прост.* танау (йөҙ) йыйырыу; **с души́ воро́тит** *прост.* күңел болғана, түҙер хәл юҡ, йәмһеҙ

**ВОРОТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әйләнеп (кире) ҡайтыу; **вороти́ться домо́й** өйгә кире ҡайтыу

**ВОРОТНИ́К** *м* яға; **отложно́й воротни́к** ҡайтарма яға; **стоя́чий воротни́к** ултырма яға

**ВОРОТНИЧО́К** *м*; *уменьш. от* **воротни́к**

**ВО́РОХ** *м* **1.** өйөм; **во́рох бума́г** ҡағыҙ өйөмө **2.** *перен.*, *разг.* бер ҡосаҡ, бик күп; **це́лый во́рох новосте́й** бер ҡосаҡ яңылыҡ **3.** *с.-х.* көшөл; **льняно́й во́рох** етен көшөлө

**ВОРО́ЧАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* әйләндереү, аҡтарыу; **воро́чать брёвна** бүрәнәләр әйләндереү **2.** *чем*; *перен.*, *разг.* (*распоряжаться*) алып барыу, башҡарыу; **он воро́чает всéми дела́ми** ул бөтә эштәрҙе алып бара

**ВОРО́ЧАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*перевёртываться*) әйләнгеләү, борғоланыу; **больно́й беспоко́йно воро́чался** ауырыу тынғыһыҙ әйләнгеләне **2.** (*шевелиться*) ҡыймылдау, һелкенеү, ҡуҙғалыу

**ВОРОШИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*переворачивать*) әйләндереү, ҡуҙғатыу, таратыу; **вороши́ть**

**се́но** бесән әйләндереү **2.** *прост.* (*шевелить*) ҡыймылдатыу, һелкетеү, туҙғытыу; **ве́тер вороши́т во́лосы** ел сәсте туҙғыта

**ВОРС** *м* өбөрө, өлпә, өлпәк; **гла́дить по во́рсу** өбөрө уңайына һыпырыу

**ВОРСИ́НКА** *ж* **1.** өбөрө, өлпә, өлпәк **2.** *бот.* үҫенте, төксә **3.** *анат.* төксә (*эсәктә*)

**ВОРСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое өбөрөлө, йөнлө, йөнтәҫ; **ворси́стое одея́ло** йөнтәҫ одеял

**ВОРСИ́ТЬ** *несов. что см.* **ворсова́ть**

**ВОРСОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өбөрөләү ...ы, йөнтәҫләндереү ...ы, өбөрөләй торған, йөнтәҫләндерә торған; **ворсова́льная маши́на** өбөрөләү машинаһы

**ВОРСОВА́ТЬ** *несов. что* өбөрөләү, йөнтәҫләндереү

**ВОРЧА́ТЬ** *несов.* **1.** ырылдау; **соба́ка ворчи́т** эт ырылдай **2.** *разг.* (*сердито бормотать, брюзжать*) мығырлау, мыжыу, һөйләнеү; **стари́к всегда́ ворча́л** ҡарт һәр ваҡыт мыжый ине

**ВОРЧЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мығырлаҡ, мыжыҡ; **ворчли́вый челове́к** мыжыҡ кеше **2.** ризаһыҙ, асыулы; **ворчли́вый го́лос** асыулы тауыш

**ВОРЧУ́Н** *м* и **ВОРЧУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* мығырлаҡ, мыжыҡ, һөйләнсек

**ВОСВОЯ́СИ** *нареч.*; *разг.* үҙ өйөнә, үҙ юлына; **пойти́ восвоя́си** үҙ өйөнә китеү

**ВОСЕМНА́ДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун һигеҙенсе; **восемна́дцатый но́мер** ун һигеҙенсе номер

**ВОСЕМНА́ДЦАТЬ** *числ.* ун һигеҙ

**ВО́СЕМЬ** *числ.* һигеҙ

**ВО́СЕМЬДЕСЯТ** *числ.* һикһән

**ВОСЕМЬСО́Т** *числ.* һигеҙ йөҙ

**ВО́СЕМЬЮ** *нареч.* һигеҙ тапҡыр, һигеҙ ерҙә; **во́семью во́семь — шестьдеся́т четы́ре** һигеҙ (ерҙә) һигеҙең алтмыш дүрт

**ВОСК** *м* балауыҙ; **пчели́ный воск** бал ҡорто балауыҙы; **расти́тельный воск** үҫемлек балауыҙы

**ВОСКЛИ́КНУТЬ** *сов.* тойғо (тулҡынланыу) менән ҡысҡырыу, ҡысҡырып ҡуйыу (ебәреү); **воскли́кнул от ра́дости** шатлыҡтан ҡысҡырып ебәрҙе

**ВОСКЛИЦА́НИЕ** *с* ҡысҡырыу, ҡысҡырыу тауышы, ауаз, тауыш; **ра́достное восклица́ние** шатлыҡлы тауыш

**ВОСКЛИЦА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өндәү ...ы; **восклица́тельный знак** *грам.* өндәү билдәһе; **восклица́тельная интона́ция** өндәү интонацияһы

**ВОСКЛИЦА́ТЬ** *несов. см.* **воскли́кнуть**

**ВОСКО́ВКА** *ж* восковка, балауыҙланған ҡағыҙ (*күсермәләр алыу өсөн*)

**ВОСКОВО́Й,** -ая, -ое **1.** балауыҙ; **воскова́я свеча́** балауыҙ шәм **2.** *перен.* аҡһыл һары, балауыҙҙай һары; **восково́е лицо́** балауыҙҙай һары йөҙ ♦ **воскова́я спе́лость (зре́лость)** емгә ултырыу

**ВОСКРЕСА́ТЬ** *несов. см.* **воскре́снуть**

**ВОСКРЕСЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **воскре́снуть** **2.** *перен.* (*возрождение*) яңынан тыуыу, йәнләнеү

**ВОСКРЕСЕ́НЬЕ** *с* йәкшәмбе

**ВОСКРЕСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* терелтеү, үлгәндән һуң терелтеү, йән индереү **2.** *кого-что*; *перен.* көс индереү, хәл алдырыу, уятыу; **воскреси́ть наде́жду** өмөт уятыу **3.** *кого-что*; *перен.* (*восстановить в сознании*) күҙ алдына килтереү, иҫкә төшөрөү; **воскреси́ть в па́мяти мо́лодость** йәшлекте иҫкә төшөрөү

**ВОСКРЕ́СНИК** *м* өмә, йәкшәмбе өмәһе

**ВОСКРЕ́СНУТЬ** *сов.* **1.** терелеү, үлгәндән һуң терелеү, йән инеү **2.** *перен.* көс инеү, хәл алыу, уяныу **3.** *перен.* күҙ алдына килеү, иҫкә төшөү; **в па́мяти воскре́сло про́шлое** үткәндәр күҙ алдына килде

**ВОСКРЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое йәкшәмбе, йәкшәмбе ...ы; **воскре́сный день** йәкшәмбе көн; **воскре́сный о́тдых** йәкшәмбе ялы ♦ **воскре́сные шко́лы** йәкшәмбе мәктәптәре (*йәкшәмбе көндө генә эшләй торған мәктәптәр*)

**ВОСКРЕША́ТЬ** *несов. см.* **воскреси́ть**

**ВОСПАЛЕ́НИЕ** *с* шешеү, елһенеү; **воспале́ние лёгких** үпкә шешеүе; **воспале́ние сре́днего у́ха** татран

**ВОСПАЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **воспали́ть** **2.** *прил.* шешкән, елһенгән, ҡыҙарған; **воспалённые глаза́** елһенгән күҙҙәр

**ВОСПАЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шешеү ...ы; **воспали́тельный проце́сс** шешеү процесы

**ВОСПАЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вызвать воспаление*) шештереү, елһендереү, ҡыҙартыу **2.** *уст.* (*возбудить чувства*) уятыу, тоҡандырыу, ҡабыҙыу; **воспали́ть воображе́ние** хыял уятыу

**ВОСПАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** шешеү, елһенеү, ҡыҙарыу **2.** *чем*; *уст.* уяныу, тоҡаныу, ҡабыныу; **воспали́ться гне́вом** асыу тоҡаныу

**ВОСПАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **воспали́ть**

**ВОСПАЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **воспали́ться**

**ВОСПЕВА́ТЬ** *несов. см.* **воспе́ть**

**ВОСПЕ́ТЬ** *сов. кого-что*; *высок.* дан йырлау, данлыҡлау, маҡтап йырлау, маҡтау; **воспе́ть родну́ю зе́млю** тыуған ерҙе маҡтап йырлау

**ВОСПИТА́НИЕ** *с* **1.** тәрбиәләү; **воспита́ние дете́й** балалар тәрбиәләү; **воспита́ние во́ли** ихтыяр тәрбиәләү **2.** тәрбиә; **физи́ческое воспита́ние** физик тәрбиә; **дать хоро́шее воспита́ние** яҡшы тәрбиә биреү

**ВОСПИ́ТАННИК** *м* и **ВОСПИ́ТАННИЦА** *ж* **1.** (*питомец*) тәрбиәләнеүсе **2.** (*приёмыш*) аҫрау, аҫрау бала **3.** уҡыусы, уҡыу тамамлаған кеше, шәкерт; **воспи́танник педагоги́ческого институ́та** педагогия институтын тамамлаған кеше

**ВОСПИ́ТАННОСТЬ** *ж* тәрбиәлелек, инсафлылыҡ, әҙәплелек

**ВОСПИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **воспита́ть 2.** *прил.* тәрбиәле, инсафлы, әҙәпле; **он воспи́танный челове́к** ул тәрбиәле кеше

**ВОСПИТА́ТЕЛЬ** *м* и **ВОСПИТА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* тәрбиәсе; **воспита́тель интерна́та** интернат тәрбиәсеһе

**ВОСПИТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тәрбиә ...ы, тәрбиәүи ...ы; **воспита́тельная рабо́та** тәрбиә эше; **воспита́тельное значе́ние труда́** хеҙмәттең тәрбиәүи әһәмиәте

**ВОСПИТА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *в разн. знач.* тәрбиәләү, тәрбиә биреү, тәрбиәләп үҫтереү; **воспита́ть дете́й** балаларҙы тәрбиәләп үҫтереү; **воспита́ть уваже́ние к ста́ршим** өлкәндәргә хөрмәт тәрбиәләү **2.** (*вырастить по известной системе — о животных, растениях*) ҡарап үҫтереү; **воспита́ть расте́ние** үҫемлекте ҡарап үҫтереү

**ВОСПИТА́ТЬСЯ** *сов.* тәрбиәләнеү, тәрбиә алыу

**ВОСПИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **воспита́ть**

**ВОСПИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воспита́ться 2.** *страд. от* **воспи́тывать**

**ВОСПЛАМЕНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тоҡандырыу, тоҡандырып ебәреү, ҡабыҙыу, ҡабыҙып ебәреү, яндырыу **2.** *кого-что*; *перен.* рухландырыу, дәртләндереү, дәрт биреү, рухландырып ебәреү; **воспламени́ть воображе́ние** хыялға дәрт биреү

**ВОСПЛАМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тоҡаныу, тоҡанып китеү, ҡабыныу **2.** *перен.* рухланыу, дәртләнеү

**ВОСПЛАМЕНЯ́ЕМОСТЬ** *ж* тоҡаныусанлыҡ; **воспламеня́емость горю́чего** яғыулыҡтың тоҡаныусанлығы

**ВОСПЛАМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **воспламени́ть**

**ВОСПЛАМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воспламени́ться 2.** *страд. от* **воспламеня́ть**

**ВОСПО́ЛНИТЬ** *сов. что* тулыландырыу, тултырыу, ҡайтарыу, ҡаплау

**ВОСПО́ЛНИТЬСЯ** *сов.* тулыланыу, тулыу, ҡапланыу

**ВОСПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **воспо́лнить**

**ВОСПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воспо́лниться 2.** *страд. от* **восполня́ть**

**ВОСПО́ЛЬЗОВАТЬСЯ** *сов. чем* файҙаланыу, файҙаланып алыу (ҡалыу); **воспо́льзоваться слу́чаем** мөмкинлектән файҙаланып ҡалыу

**ВОСПОМИНА́НИЕ** *с* **1.** см. **вспо́мнить 2.** *мн.* **воспомина́ния** иҫтәлек(тәр), хәтирә(ләр); **литерату́рные воспомина́ния** әҙәби иҫтәлектәр; **воспомина́ния де́тства** бала саҡ хәтирәләре; **преда́ться воспомина́ниям** хәтирәләргә бирелеү

**ВОСПРЕПЯ́ТСТВОВАТЬ** *сов. кому-чему* тотҡарлау, ҡамасаулау, ҡаршы төшөү, кәртә ҡуйыу; **воспрепя́тствовать наме́рениям** *чьим-л.* *кемдеңдер* теләгенә ҡаршы төшөү; **воспрепя́тствовать продвиже́нию проти́вника** дошмандың алға үтеүенә ҡамасаулау

**ВОСПРЕТИ́ТЬ** *сов. что* и *с неопр.*; *книжн.*, *офиц.-дел.* тыйыу, рөхсәт итмәү, юл ҡуймау; **вход воспрещён** инеү тыйылған

**ВОСПРЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **воспрети́ть**

**ВОСПРЕЩА́ТЬСЯ** *несов.*; *книжн.*, *офиц.-дел.* тыйылыу, рөхсәт ителмәү; **кури́ть воспреща́ется** тартыу тыйыла

**ВОСПРЕЩЕ́НИЕ** *с* тыйыу, рөхсәт итмәү, юл ҡуймау

**ВОСПРИИ́МЧИВОСТЬ** *ж* **1.** отҡорлоҡ, зирәклек; **восприи́мчивость к зна́ниям** белемгә зирәклек **2.** (тиҙ) бирешеүсәнлек; **восприи́мчивость к боле́зням** ауырыуҙарға тиҙ бирешеүсәнлек

**ВОСПРИИ́МЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** отҡор, зирәк, һәләтле; **восприи́мчивый ребёнок** отҡор бала **2.** (тиҙ) бирешеүсән; **восприи́мчивый к боле́зням челове́к** ауырыуҙарға тиҙ бирешеүсән кеше

**ВОСПРИНИМА́ТЬ** *несов. см.* **восприня́ть**

**ВОСПРИНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡабул ителеү, үҙләштереү **2.** *страд. от* **воспринима́ть**

**ВОСПРИНЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** алыу, ҡабул итеү; **восприня́ть тепло́** йылы ҡабул итеү **2.** аңлау, үҙләштереү, төшөнөү; **неве́рно восприня́ть ска́занное** әйткәнде яңылыш аңлау

**ВОСПРИЯ́ТИЕ** *с*; *псих.*, *филос.* зиһенгә алыу, аңлау, үҙләштереү; **зако́ны восприя́тия** үҙләштереү ҡанундары

**ВОСПРОИЗВЕДЕ́НИЕ** *с см.* **воспроизвести́**

**ВОСПРОИЗВЕСТИ́** *сов. что* **1.** яңынан барлыҡҡа килтереү, ҡабатлап етештереү **2.** иҫкә (хәтергә) төшөрөү, (оҡшатып) ҡабатлау, яңынан тыуҙырыу; **воспроизвести́ моти́в** көйҙө иҫкә төшөрөү **3.** ижад итеү, яңынан тергеҙеү; **воспроизвести́ карти́ну бо́я** һуғыш картинаһын тергеҙеү

**ВОСПРОИЗВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **воспроизвести́**

**ВОСПРОИЗВО́ДСТВО** *с* яңынан (ҡайтанан) етештереү, ҡабатлап етештереү; **просто́е воспроизво́дство** ябай ҡайтанан етештереү; **расши́ренное воспроизво́дство** киңәйтелгән яңынан етештереү; **противоре́чия воспроизво́дства** ҡайтанан етештереүҙең ҡапма-ҡаршылыҡтары

**ВОСПРОТИ́ВИТЬСЯ** *сов. кому-чему* ҡаршылыҡ күрһәтеү, ҡаршы килеү (төшөү); **воспроти́виться реше́нию** *какому-л.* *ниндәйҙер* ҡарарға ҡаршы килеү

**ВОСПРЯ́НУТЬ** *сов.*; *высок.*, *уст.* һикереп тороу, аяҡҡа баҫыу ♦ **воспря́нуть ду́хом** күңел күтәрелеү, дәртләнеп (рухланып) китеү

**ВОСПЫЛА́ТЬ** *сов. чем*; *уст.* яныу, янып китеү, ҡабыныу, ҡабынып китеү, ярһыу, ярһып китеү; **воспыла́ть гне́вом** асыу менән яныу

**ВОССЕДА́ТЬ** *несов.* эре ҡиәфәт менән ултырыу, тантаналы итеп ултырыу

**ВОССЕ́СТЬ** *сов.* эре генә барып (килеп) ултырыу, тантаналы ҡиәфәт менән барып (килеп) ултырыу

**ВОССЛА́ВИТЬ** *сов. кого-что*; *уст.*, *высок.* данлау, данлыҡлау, дан йырлау, маҡтау; **восслáвить свобо́ду** азатлыҡты данлау

**ВОССЛАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **восслáвить**

**ВОССОЕДИНЕ́НИЕ** *с* яңынан ҡушыу (ҡушылыу), ҡайтанан берләштереү (берләшеү); **воссоединéние нарóда** халыҡтың ҡайтанан берләшеүе

**ВОССОЕДИНИ́ТЬ** *сов. кого-что* яңынан ҡушыу, ҡайтанан берләштереү; **воссоедини́ть семью́** ғаиләне яңынан ҡушыу

**ВОССОЕДИНИ́ТЬСЯ** *сов.* яңынан ҡушылыу, ҡайтанан берләшеү; **воссоедини́ться с Росси́ей** Рәсәй менән яңынан ҡушылыу

**ВОССОЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **воссоедини́ть**

**ВОССОЕДИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воссоедини́ться 2.** *страд. от* **воссоединя́ть**

**ВОССОЗДАВА́ТЬ** *несов. см.* **воссоздáть**

**ВОССОЗДА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*создать вновь*) яңынан барлыҡҡа килтереү, элекке хәленә ҡайтарыу, тергеҙеү **2.** (*восстановить в памяти*) иҫкә (хәтергә) төшөрөү, күҙ алдына килтереү **3.** (*творчески воспроизвести*) ижад итеү, яңынан тергеҙеү

**ВОССТАВА́ТЬ** *несов. см.* **восстáть**

**ВОССТАНА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **восстанови́ть**

**ВОССТАНА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **восстанови́ться 2.** *страд. от* **восстанáвливать**

**ВОССТА́НИЕ** *с* баш күтәреү, күтәрелеш, ихтилал; **вооружённое восстáние** ҡораллы күтәрелеш

**ВОССТАНОВИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** (*участник восстановительных работ*) тергеҙеүсе, аяҡҡа баҫтырыусы, яңынан төҙөүсе; **восстанови́тель железнодорóжного полотнá** тимер юл полотнаһын тергеҙеүсе **2.** *хим.* элекке хәленә ҡайтарыусы матдә **3.** (*для волос*) төҫ ҡайтарғыс

**ВОССТАНОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аяҡҡа баҫтырыу ...ы, тергеҙеү ...ы; **восстанови́тельный пери́од** аяҡҡа баҫтырыу осоро

**ВОССТАНОВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* элекке хәленә ҡайтарыу, кире ҡайтарыу, аяҡҡа баҫтырыу, тергеҙеү, яңыртыу; **восстанови́ть разру́шенное войнóй хозя́йство** һуғыш тарафынан емерелгән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу; **восстанови́ть пре́жние отношéния** элекке мөнәсәбәттәрҙе яңыртыу **2.** *перен.* (*воспроизвести*) күҙ алдына килтереү, иҫкә (хәтергә) төшөрөү; **восстанови́ть в пáмяти** хәтергә төшөрөү **3.** *в чём* ҡайтарыу, кире ҡайтарыу, кире биреү; **восстанови́ть в правáх** хоҡуғын кире ҡайтарыу **4.** *против кого-чего* (*враждебно настроить*) ҡаршы ҡуйыу, дошманлаштырыу; **восстанови́ть общéственность прóтив властéй** йәмғәтселекте власҡа ҡаршы ҡуйыу

**ВОССТАНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** элекке хәленә ҡайтыу, кире ҡайтыу, аяҡҡа баҫыу, нығыныу, тергеҙелеү, яңырыу; **жизнь восстанови́лась** тормош элекке хәленә ҡайтты; **здорóвье восстанови́лось** сәләмәтлек нығынды **2.** *перен.* (*вновь возникнуть в памяти*) күҙ алдына килеү, иҫкә (хәтергә) төшөү **3.** *в чём* кире алыу, кире ҡайтарып алыу (ҡайтарыу); **восстанови́ться в правáх** хоҡуҡтарҙы кире ҡайтарып алыу

**ВОССТАНОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **восстанови́ть, восстанови́ться**

**ВОССТА́ТЬ** *сов.* **1.** күҙ алдына баҫыу, иҫкә төшөү, хәтергә килеү **2.** ҡаршы күтәрелеү, баш күтәреү; **нарóд восстáл прóтив врагá** халыҡ дошманға ҡаршы күтәрелде **3.** (*не согласиться с кем-чем-л.*) ҡаршы тороу, ҡаршы сығыу, ҡаршы төшөү

**ВОСТÓК** *м* **1.** (*сторона света*) көнсығыш, шәреҡ **2.** (*страны, расположенные в этом направлении*) Көнсығыш, Шәреҡ; **Бли́жний Востóк** Яҡын Көнсығыш; **изучéние Востóка** Көнсығыш илдәрен өйрәнеү

**ВОСТОКОВÉД** *м* Көнсығыш илдәрен (Шәреҡте) өйрәнеүсе, шәрҡиәтсе

**ВОСТОКОВÉДЕНИЕ** *с* Көнсығыш илдәрен өйрәнеү фәне, шәрҡиәт

**ВОСТОКОВÉДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое Көнсығыш илдәрен (Шәреҡте) өйрәнеү ...ы; **востоковéдческие проблéмы** Шәреҡте өйрәнеү проблемалары

**ВОСТÓРГ** *м* ҙур шатлыҡ (ҡыуаныс), һоҡланыу, таң ҡалыу; **быть в востóрге** ҙур шатлыҡ кисереү; **прийти́ в востóрг** таң ҡалыу; **смотрéть с востóргом** *на кого-л. кемгәлер* һоҡланып ҡарау

**ВОСТОРГА́ТЬ** *несов. кого-что* иҫ китәреү, һоҡландырыу, таң ҡалдырыу

**ВОСТОРГА́ТЬСЯ** *несов. кем-чем* ныҡ шатланыу, ҡыуаныу, һоҡланыу, таң ҡалыу

**ВОСТÓРЖЕННОСТЬ** *ж* һоҡланыусанлыҡ, таң ҡалыусанлыҡ

**ВОСТÓРЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** шатланыусан, һоҡланыусан, таң ҡалыусан; **востóрженный ю́ноша** һоҡланыусан үҫмер **2.** шатлыҡлы, һоҡланыулы; **востóрженный взгляд** һоҡланыулы ҡараш

**ВОСТОРЖЕСТВОВА́ТЬ** *сов. над кем-чем-л.* еңеү, еңеп сығыу, өҫкә сығыу; **прáвда восторжествовáла** дөрөҫлөк еңеп сыҡты

**ВОСТÓЧНЫЙ,** -ая, -ое көнсығыш, көнсығыш ...ы, көнсығыштағы; **востóчная грани́ца** көнсығыш сик; **востóчный вéтер** көнсығыш еле; **востóчные нарóды** көнсығыш халыҡтары

**ВОСТРÉБОВАНИЕ** *с*; *офиц.-дел.* һорап алыу, талап итеп алыу ♦ **до востребования** почтала һорап алына торған (*хат һ.б.*)

**ВОСТРÉБОВАТЬ** *сов. что*; *офиц.-дел.* һорап (талап итеп) алыу; **востребовать багáж** багажды һорап алыу

**ВОСТРÓ: держáть у́хо вострó** һаҡ булыу, уяу булыу, һиҙгер булыу

**ВОСХВАЛÉНИЕ** *с* ныҡ маҡтау, күккә күтәреү

**ВОСХВАЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* ныҡ маҡтап ташлау, күккә күтәреү; **восхвали́ть ученикá** уҡыусыны үтә ныҡ маҡтап ташлау

**ВОСХВАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **восхвали́ть**

**ВОСХИТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һоҡланғыс, һоҡланырлыҡ, таң ҡалдырғыс; **восхити́тельный ве́чер** һоҡланғыс кисә

**ВОСХИТИ́ТЬ** *сов. кого-что* таң (хайран) ҡалдырыу, һоҡландырыу; **меня́ восхити́ло её пе́ние** уның йырлауы мине таң ҡалдырҙы

**ВОСХИТИ́ТЬСЯ** *сов. кем-чем* һоҡланыу, хайран (таң) ҡалыу; **восхити́ться бра́том** ағайға һоҡланыу; **восхити́ться пейза́жем** тәбиғәт күренешенә таң ҡалыу

**ВОСХИЩА́ТЬ** *несов. см.* **восхити́ть**

**ВОСХИЩА́ТЬСЯ** *несов. см.* **восхити́ться**

**ВОСХИЩЕ́НИЕ** *с* һоҡланыу, хайран (таң) ҡалыу; **привести́ в восхище́ние** һоҡландырыу; **прийти́ в восхище́ние** таң ҡалыу, һоҡланыу; **с восхище́нием смотре́ть** *на что-л.* һоҡланып ҡарау; **вы́разить своё восхище́ние** үҙеңдең һоҡланыуыңды белдереү

**ВОСХО́Д** *м* **1.** менеү, күтәрелеү; **восхо́д на верши́ну горы́** тау түбәһенә менеү **2.** сығыу, ҡалҡыу (*ҡояш*); тыуыу (*көн*); ҡалҡыу (*ай*); **восхо́д со́лнца** ҡояш сығыу; **до восхо́да луны́** ай ҡалҡҡанға тиклем **3.** ҡояш сығышы, көнсығыш; **восхо́д заале́л** ҡояш сығышы алһыуланды

**ВОСХОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** менеү, күтәрелеү; **восходи́ть на го́ру** тауға менеү **2.** сығыу (*ҡояш*); ҡалҡыу (*ҡояш, ай*); **восхо́дит луна́** ай ҡалҡа **3.** барып тоташыу, ҡайтып ҡалыу; **восходи́ть к дре́вности** боронғо заманға барып тоташыу

**ВОСХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **восходи́ть 2.** *прил.* күтәрелә (ҡалҡа) барған, күтәрелеп (сығып) килгән, күтәрелеүсе, үҫә барыусы, күтәрелә барыусы; **восходя́щее движе́ние** үҫә барыусы хәрәкәт; **восходя́щая крива́я** юғары күтәрелеүсе кәкре һыҙыҡ ♦ **восходя́щее свети́ло**; **восходя́щая звезда́** даны күтәрелә барған кеше; **восходя́щая интона́ция** *лингв.* һөйләм аҙағына табан күтәрелә барыусы интонация; **восходя́щее ударе́ние** *лингв.* күтәрелә барыусы баҫым

**ВОСХОЖДЕ́НИЕ** *с* күтәрелеү, менеү; **восхожде́ние на го́ру** тау башына менеү; **восхожде́ние со́лнца** ҡояш күтәрелеү

**ВОСШЕ́СТВИЕ: восше́ствие на престо́л** *уст.* тәхеткә ултырыу, батшалыҡ итә башлау

**ВОСЬМЕРИ́К** *м*; *уст.* һигеҙ(ле), һигеҙ үлсәүле, һигеҙ өлөштән торған; **ги́ря восьмери́к** һигеҙле гер; **верёвка восьмери́к** һигеҙҙән үрелгән бау

**ВОСЬМЁРКА** *ж* **1.** (*цифра*) һигеҙле, һигеҙ һаны **2.** *разг.* (*группа из восьми*) һигеҙ; **восьмёрка самолётов** һигеҙ самолёт **3.** *разг.* (*название*) һигеҙенсе (*трамвай, автобус һ.б.*) **4.** *карт.* һигеҙле, һигеҙлек; **восьмёрка пик** ҡарғаның һигеҙлеһе (һигеҙлеге) **5.** (*восьмивесельная лодка*) һигеҙ ишкәкле кәмә

**ВО́СЬМЕРО** *числ. собир.* һигеҙ

**ВОСЬМИ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һигеҙ", "һигеҙ өлөштән торған", "һигеҙле" һүҙҙәрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **восьмиуго́льный** һигеҙ мөйөшлө; **восьмиэта́жный** һигеҙ ҡатлы

**ВОСЬМИГРА́ННЫЙ,** -ая, -ое һигеҙ ҡырлы; **восьмигра́нная фигу́ра** һигеҙ ҡырлы фигура

**ВОСЬМИДЕСЯТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) һикһән йыллыҡ **2.** (*о возрасте*) һикһән йәшлек, һикһәндәге

**ВОСЬМИДЕСЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* һикһәненсе; **восьмидеся́тые го́ды** һикһәненсе йылдар; **восьмидеся́тый но́мер** һикһәненсе номер

**ВОСЬМИДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое һигеҙ көн буйы, һигеҙ көнлөк; **восьмидне́вная забасто́вка** һигеҙ көн буйы барған забастовка; **восьмидне́вный запа́с то́плива** һигеҙ көнлөк яғыулыҡ запасы

**ВОСЬМИКЛА́ССНИК** *м* и **ВОСЬМИКЛА́ССНИЦА** *ж* һигеҙенсе синыф уҡыусыһы, һигеҙенсе синыфта уҡыусы

**ВОСЬМИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) һигеҙ йыллыҡ, һигеҙ йыл; **восьмиле́тняя шко́ла** һигеҙ йыллыҡ мәктәп; **восьмиле́тнее отсу́тствие** һигеҙ йыл булмау **2.** (*о возрасте*) һигеҙ йәшлек, һигеҙҙәге; **восьмиле́тняя де́вочка** һигеҙ йәшлек ҡыҙ

**ВОСЬМИСО́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* һигеҙ йөҙөнсө

**ВОСЬМИУГО́ЛЬНИК** *м* һигеҙмөйөш

**ВОСЬМИЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** һигеҙ сәғәтлек ...ы; **восьмичасово́й рабо́чий день** һигеҙ сәғәтлек эш көнө **2.** *разг.* (*назначенный на восемь часов*) сәғәт һигеҙҙәге; **восьмичасово́й по́езд** сәғәт һигеҙҙәге поезд

**ВОСЬМО́Й,** -ая, -ое *числ.* һигеҙенсе

**ВОСЬМУ́ШКА** *ж* **1.** (*1/8 фунта*) әсмүхә; **восьму́шка ча́ю** бер әсмүхә сәй **2.** (*1/8 часть*) һигеҙҙән бер өлөш; **восьму́шка бума́жного листа́** ҡағыҙ табағының һигеҙҙән бер өлөшө

**ВОТ** *частица* **1.** (*при указании на кого-что-л., находящееся в непосредственной близости*) бына; **вот идёт по́езд** бына поезд килә **2.** (*для усиления значений местоимений и наречий*) бына; **вот хорошо́** бына яҡшы ♦ **вот ещё!** бына тағын!; **вот так** бына шулай; **во́т я тебя́ (его́, их и т.д.)!** бына мин һине (уны, уларҙы һ.б.)!; **вот тебе́ (и) на́**; **вот тебе́ (те) ра́з**; **вот так та́к!** бынағайыш!, бына һиңә кәрәк булһа!; **во́т (оно́) что (как)** бына нимә, бына эш нимәлә икән, бына нисек

**ВОТ-ВО́Т** *нареч.*; *разг.* хәҙер, бына-бына, бына хәҙер, хәҙер генә; **вот-во́т он подойдёт** ул бына хәҙер килеп етер

**ВОТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* тауышҡа ҡуйып ҡарар ҡабул итеү, ҡарар сығарыу; **воти́ровать креди́ты** кредиттар буйынса ҡарар сығарыу

**ВОТКНУ́ТЬ** *сов. что, во что* ҡаҙау, сәнсеү, ҡаҙап ҡуйыу, сәнсеп ҡуйыу; **воткну́ть иго́лку** энә сәнсеп ҡуйыу; **воткну́ть кол в зе́млю** ҡаҙыҡты ергә ҡаҙап ҡуйыу

**ВОТКНУ́ТЬСЯ** *сов.* ҡаҙалыу, сәнселеү

**ВО́ТУМ** *м* вотум (*тауыш биреү юлы менән парламентта сығарылған ҡарар*) ♦ **во́тум дове́рия** ышаныс вотумы; **во́тум недове́рия** ышанмауҙы белдергән вотум

**ВО́ТЧИНА** *ж*; *ист.* биләмә (*Рәсәйҙә эре ер биләүсенең варисҭарына күсә килгән ере*)

**ВОТЯКИ́** *мн.*; *уст.* вотяктар (*удмурттарҙың элекке исеме*) // *ед.* **вотя́к** *м* вотяк ир-аты; **вотя́чка** *ж* вотяк ҡатын-ҡыҙы

**ВОЦАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* (*вступить на престол*) батшалыҡ итә башлау, тәхеткә ултырыу **2.** хөкөм һөрөү, урынлашыу; **воцари́лась по́лная тишина́** тулы тынлыҡ урынлашты

**ВОЦАРЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **воцари́ться**

**ВОШЬ** *ж* бет ♦ **расти́тельная вошь** кеблә

**ВОЩА́НКА** *ж* балауыҙланған ҡағыҙ, балауыҙлы туҡыма

**ВОЩЁНЫЙ,** -ая, -ое балауыҙлы, балауыҙланған; **вощёная бума́га** балауыҙлы ҡағыҙ

**ВОЩИ́НА** *ж* **1.** кәрәҙ **2.** балауыҙ

**ВОЩИ́ТЬ** *несов. что* балауыҙлау, балауыҙ һеңдереү; **вощи́ть бума́гу** ҡағыҙ балауыҙлау

**ВОЯ́КА** *м*; *разг.*, *ирон.* **1.** (тәжрибәле) һуғышсы **2.** (*задира*) һуғыш суҡмары

**ВПАДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **впасть 2.** (*о реке, ручье*) ҡойоу, ҡушылыу, тоташыу; **Дёма впада́ет в Бе́лую** Дим Ағиҙелгә ҡоя

**ВПАДЕ́НИЕ** *с* **1.** ҡойоу, ҡушылыу, тоташыу; **впаде́ние реки́ в мо́ре** йылғаның диңгеҙгә ҡойоуы **2.** (*устье реки*) йылға тамағы, ике йылғаның ҡушылған урыны

**ВПА́ДИНА** *ж* сөңгөл, уйпат, соҡор ♦ **глазна́я впа́дина** *анат.* күҙ соҡоро

**ВПА́ЙКА** *ж* **1.** иретеп йәбештереү **2.** (*то, что впаяно*) иретеп йәбештерелгән нәмә

**ВПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое батынҡы, батып ингән, эскә батҡан; **впа́лая грудь** эскә батҡан күкрәк

**ВПАСТЬ** *сов.* **1.** эскә батыу (инеү); **у неё глаза́ впа́ли** уның күҙҙәре эскә батҡан **2.** *во что* төшөү, бирелеү, ҡалыу; **впасть в отча́яние** өмөтһөҙлөккә бирелеү ♦ **впасть в де́тство** бала аҡылына төшөү; **впасть в неми́лость** сит күренеү, рәхимлектән мәхрүм булыу; **впасть в противоре́чие** үҙ-үҙеңә ҡаршы килеү

**ВПАЯ́ТЬ** *сов. что* иретеп йәбештереү; **впая́ть кран самова́ра** самауырҙың һемәген иретеп йәбештереү

**ВПЕРВО́Й** *нареч.*; *разг.* (*обычно с отриц.*) *см.* **впервы́е**; **ви́деть не впервы́е** беренсе тапҡыр ғына күреү түгел

**ВПЕРВЫ́Е** *нареч.* беренсе тапҡыр (мәртәбә), беренсегә; **впервы́е в жи́зни** ғүмергә беренсе тапҡыр

**ВПЕРЕБО́Й** *нареч.*; *разг.* бер-береһен бүлдерә-бүлдерә (бүлдереп); **же́нщины говори́ли вперебо́й** ҡатындар бер-береһен бүлдерә-бүлдерә һөйләй ине

**ВПЕРЕВА́ЛКУ** *нареч.*; *разг.* алпан-толпан, аушанлап; **ходи́ть вперева́лку** аушанлап йөрөү

**ВПЕРЕГОНКИ́, ВПЕРЕГО́НКИ, ВПЕРЕГО́НКУ** *нареч.*; *разг.* уҙыша-уҙыша, ҡыуыша-ҡыуыша, уҙышып, ҡыуышып; **бежа́ть вперегонки́** уҙыша-уҙыша йүгереү

**ВПЕРЁД** *нареч.* **1.** алға, алға табан; **шагну́ть вперёд** алға атлау; **вы́тянуть ру́ку вперёд** ҡулды алға табан һуҙыу **2.** *разг.* башта, элек, тәүҙә; **сходи́те вперёд** башта барып килегеҙ **3.** *разг.* алдан; **взять пла́ту вперёд** алдан түләү **4.** *в знач. межд.* алға; **взвод, вперёд!** взвод, алға!; **вперёд, жизнь!** тормош, алға! ♦ **взад и вперёд** бер алға, бер артҡа; **шаг вперёд** бер аҙым алға

**ВПЕРЕДИ́** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* алда, алдан; **идти́ впереди́** алдан барыу; **впереди́ показа́лся лес** алда урман күренде **2.** *нареч.* киләсәктә, алда; **у него́ вся жизнь ещё впереди́** уның бөтә тормошо алда әле; **что ждёт впереди́?** киләсәктә нимә көтә? **3.** *предлог с род. п.* алда, алдынан; **он е́хал впереди́ всех** ул бөтәһенән дә алда барҙы ♦ **быть впереди́** *кого-чего* алдын булыу, алдынғы

**ВПЕРЕМЕ́ЖКУ** *нареч.*; *разг.* алмаш-тилмәш, алмашлап, аралашып, аралаш; **сиде́ть вперeме́жку** аралаш ултырыу

**ВПЕРЕМЕ́ШКУ** *нареч.*; *разг.* буталып, буталышып; **вперeме́шку с паке́тами лежа́ли мешки́** пакеттар менән буталып тоҡтар ята ине

**ВПЕРЕХВА́Т** *нареч.*; *прост.* **1.** әйләндереп алып **2.** (*наперерез*) юлына арҡыры төшөп, юлын киҫеп

**ВПЕРИ́ТЬ: впери́ть взор (взгляд, глаза́)** күҙ текәү, ҡараш төбәү, теклэп ҡарау; **впери́ть глаза́ в потоло́к** түбәгә теклэп ҡарау

**ВПЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **впери́ть**

**ВПЕЧАТЛЕ́НИЕ** *с* **1.** тәьҫир, тәьҫорат, күңелдәге эҙ; **впечатле́ния пе́рвых полётов** тәүге осош тәьҫораттары **2.** йоғонто, тәьҫир; **находи́ться под впечатле́нием** *чего-л. берәй нәмәнең* тәьҫирендә булыу; **производи́ть си́льное впечатле́ние** көслө тәьҫир итеү **3.** тәьҫорат, тәьҫир, фекер; **дели́ться впечатле́ниями о путеше́ствии** сәйәхәт тураһындағы тәьҫораттар менән уртаҡлашыу

**ВПЕЧАТЛИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* күңелсәклек, йомшаҡ күңеллелек, тәьҫирләнеүсәнлек, әҫәрләнеүсәнлек; **отлича́ется впечатли́тельностью** күңелсәклеге менән айырыла

**ВПЕЧАТЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ күңелле, тәьҫирләнеүсән, тәьҫиргә бирелеүсән, әҫәрләнеүсән; **впечатли́тельная нату́ра** тәьҫиргә бирелеүсән, йомшаҡ тәбиғәтле күңел

**ВПЕЧАТЛЯ́ТЬ** *несов.*; *разг.* тәьҫир итеү, тәьҫир ҡалдырыу

**ВПЕЧАТЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **впечатля́ть** **2.** *прил.* тәьҫирле; **впечатля́ющее сло́во** тәьҫирле һүҙ

**ВПИВА́ТЬ** *несов.* үҙ эсеңә алыу, үҙеңә алыу, йотолоу, һулау, үҙләштереү, һеңдереү; **впива́ть всё но́вое** барлыҡ яңылыҡты үҙләштереү; **впива́ть ра́дости жи́зни** тормош шатлыҡтарын һулау

**ВПИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **впи́ться**

**ВПИ́САННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* араһына яҙып ҡуйылған, өҫтәп яҙылған **2.** *прил.*; *мат.* ҡамаулы, ҡамалған; **впи́санный треуго́льник** ҡамалған өсмөйөш

**ВПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* өҫтәп яҙыу, өҫтәп яҙып ҡуйыу, араға индереп яҙыу **2.** *что*; *мат.* эсенә һыҙыу; **вписа́ть треуго́льник в круг** түңәрәк эсенә өсмөйөш һыҙыу

**ВПИСА́ТЬСЯ** *сов. во что* **1.** *разг.* яҙылыу, теркәлеү, өҫтәп яҙылыу, ҡушылып китеү; **вписа́ться в коллекти́в** коллективҡа ҡушылып китеү **2.** (*гармонично сочетаться*) килешеү, тура килеп тороу; **серва́нт впи́сывается в обстано́вку ко́мнаты** сервант бүлмәгә килешеп тора

**ВПИ́СЫВАНИЕ** *с см.* **впи́сывать**

**ВПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **вписа́ть**

**ВПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вписа́ться** **2.** *страд. от* **впи́сывать**

**ВПИТА́ТЬ** *сов. что* **1.** һеңдереү, үҙенә тартыу, һурыу; **впита́ть вла́гу** дым һеңдереү **2.** *перен.* үҙләштереү, үҙенә алыу; **впита́ть но́вые иде́и** яңы идеяларҙы үҙләштереү

**ВПИТА́ТЬСЯ** *сов.* һеңеү, һурылыу; **вода́ впита́лась в зе́млю** һыу ергә һеңгән

**ВПИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **впита́ть**

**ВПИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **впита́ться** **2.** *страд. от* **впи́тывать**

**ВПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡаҙалыу, ҡаҙалып инеү; **клещ впи́лся** талпан ҡаҙалған **2.** ҡаҙалыу, тәрәнгә инеү; **була́вка впила́сь в па́лец** булавка бармаҡҡа ҡаҙалды **3.** батырыу, батырып индереү, сәнсеү, ҡаҙау; **впи́ться когтя́ми** тырнаҡтарҙы батырыу; **впи́ться зуба́ми** тештәрҙе батырып индереү **4.** *в кого-что, чем* и *без доп.*; *перен.* текәлеү, ҡаҙалыу; **впи́ться в карти́ну глаза́ми** картинаға текәлеү

**ВПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **впихну́ть**

**ВПИХНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** тығыу, тығып ҡуйыу (индереү) **2.** (*втолкнуть*) этеп индереү; **впихну́ть в дверь** ишектән этеп индереү

**ВПЛАВЬ** *нареч.* йөҙөп; **перепра́виться че́рез ре́ку вплавь** йылға аша йөҙөп сығыу

**ВПЛЕСТИ́** *сов. что* ҡушып үреү; **вплести́ ле́нту в ко́су** таҫманы толомға ҡушып үреү

**ВПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **вплести́**

**ВПЛОТНУ́Ю** *нареч.* **1.** (*плотно, тесно*) бик тығыҙ итеп, тығыҙ булып **2.** (*предельно близко*) терәлеп, бик яҡын, йәнәшә үк; **сиде́ть вплотну́ю** терәлеп ултырыу **3.** *перен.*, *разг.* ныҡлап, яҡындан тороп; **приня́ться вплотну́ю** *за что-л. берәй нәмәгә* ныҡлап тотоноу

**ВПЛОТЬ** *предлог с род. п.* (*в сочетании с предлогом "до"*) -ҡа/-кә тиклем (саҡлы, ҡәҙәр); **вплоть до ве́чера** кискә тиклем; **вплоть до утра́** иртәнгә саҡлы

**ВПЛЫТЬ** *сов.* **1.** йөҙөп килеп инеү, йөҙөп барып инеү, йөҙөп инеү **2.** *перен.* (*плавно войти*) шым ғына (еңел итеп) килеп инеү

**ВПОВА́ЛКУ** *нареч.*; *разг.* ҡайһылай етте, шулай, арҡыс-торҡос (ятыу); **спать впова́лку** арҡыс-торҡос ятып йоҡлау

**ВПОЛГЛА́ЗА** *нареч.*; *разг.* **1.** күҙҙе яртылаш асып (ябып), күҙ ҡырыйы (сите) менән; **смотре́ть вполгла́за** күҙ ҡырыйы менән ҡарау **2.** *перен.* һаҡ; **спать вполгла́за** һаҡ йоҡлау

**ВПОЛГО́ЛОСА** *нареч.* аҡрын (ғына) тауыш менән; **петь вполго́лоса** аҡрын тауыш менән йырлау

**ВПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **вползти́**

**ВПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** (*ползком проникнуть внутрь*) шыуышып (имгәкләп) инеү **2.** (*взобраться куда-л., на что-л.*) үрмәләп менеү

**ВПОЛНАКА́ЛА** *нареч.* тоноҡ ҡына, һүрән генә

**ВПОЛНЕ́** *нареч.* тулыһынса, бөтөнләй, тамам; **я вполне́ дово́лен** мин тулыһынса ҡәнәғәтмен; **вполне́ доста́точно** тамам етерлек

**ВПОЛОБОРО́ТА** *нареч.* яртылаш боролоп, яртылыш боролған килеш; **она́ вста́ла вполоборо́та ко мне** ул миңә яртылаш боролоп баҫты

**ВПОЛОВИ́НУ** *нареч.*; *уст.*, *прост.* яртылаш, яртылай; **она́ была́ вполови́ну ру́сская** ул яртылаш мәрйә ине; **уба́вить вполови́ну** яртылай кәметеү

**ВПОПА́Д** *нареч.*; *разг.* урынлы, дөрөҫ, тура килтереп; **отвеча́ть впопа́д** урынлы яуап биреү

**ВПОПЫХА́Х** *нареч.* ашығып, ҡабаланып, ашыҡ-бошоҡ, ашыҡҡанда, ҡабаланғанда; **де́лать впопыха́х** ҡабаланып эшләү; **впопыха́х забы́л кни́гу** ашығып китапты онотоп ҡалдырғанмын

**ВПО́РУ** *нареч.*; *разг.* **1.** таман, ыҡсым; **сапоги́ мне впо́ру** итектәр миңә таман **2.** *в знач. сказ.*, *с неопр.* (бик) ваҡыт, мөмкин, бик тә мөмкин; **мне впо́ру уе́хать домо́й** миңә ҡайтырға ваҡыт

**ВПОРХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп инеү, осоп килеп инеү; **ла́сточка впорхну́ла в окно́** ҡарлуғас тәҙрәнән осоп килеп инде **2.** *перен.* еңел генә (итеп) йүгереп килеп инеү

**ВПОСЛЕ́ДСТВИИ** *нареч.* һуңынан, һуң, һуңғараҡ, аҙағынан; **впосле́дствии он узна́ет об э́том** ул һуңынан был турала белер

**ВПОТЬМА́Х** *нареч.* ҡараңғыла, ҡараңғылыҡта; **сиде́ть впотьма́х** ҡараңғыла ултырыу

**ВПРА́ВДУ** *нареч.*; *разг.* ысынлап та, дөрөҫтән дә; **я и впра́вду э́того не знал** мин ысынлап та быны белмәй инем

**ВПРА́ВЕ** *нареч. в знач. сказ.*, *с неопр.* хаҡлы, хаҡы бар; **он впра́ве спроси́ть** ул һорарға хаҡлы; **он не впра́ве поступа́ть так** уның былай эшләргә хаҡы юҡ

**ВПРА́ВИТЬ** *сов. что* **1.** (*о суставах, конечностях*) төшөрөү, ултыртыу; **впра́вить плечо́** ҡулбашын ултыртыу **2.** *разг.* (*заправить*) тығыу; **впра́вить брю́ки в голени́ща** салбар балаҡтарын ҡунысҡа тығыу

**ВПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **впра́вить**

**ВПРА́ВО** *нареч.* (*в правую сторону*) уңға, уң яҡҡа; **поверну́ть впра́во** уңға боролоу; (*справа*) уңда, уң яҡта; **впра́во от ле́са** урмандан уңда

**ВПРЕДЬ** *нареч.* киләсәктә, алда, бынан ары (кире), бынан һуң, бынан былай; **впредь будь внима́тельней** бынан кире иғтибарлыраҡ бул ♦ **впредь до** *чего* -ға/-гә тиклем (ҡәҙәр, саҡлы)

**ВПРИДА́ЧУ** *нареч.* өҫтәүенә

**ВПРИКУ́СКУ: пить вприку́ску (чай, кофе и т.п.)** шәкәр ҡабып эсеү (сәйҙе, ҡәһүәне һ.б.)

**ВПРИПРЫ́ЖКУ** *нареч.* ырғый-ырғый, һикерә-һикерә, ырғаңлап, һикерәңләп; **ма́льчик вприпры́жку побежа́л домо́й** малай һикерә-һикерә өйөнә йүгерҙе

**ВПРИСЯ́ДКУ** *нареч.* сүгәләп-сүгәләп, сүгәләй-сүгәләй, сүгә-сүгә, сүгәләп; **пусти́ться вприся́дку** сүгәләп бейергә төшөү

**ВПРИТЫ́К** *нареч.*; *разг.* (*вплотную*) йәнәшә, бер-береһенә тейеп

**ВПРО́ГОЛОДЬ** *нареч.* аслы-туҡлы, туйыр-туймаҫ; **жить впро́голодь** аслы-туклы йәшәү

**ВПРОК** *нареч.* **1.** (*про запас*) запасҡа, алдағы көнгә, һаҡлыҡҡа; **загото́вить проду́кты впрок** алдағы көнгә аҙыҡ-түлек әҙерләү **2.** *в знач. сказ.* файҙаға булыу, файҙаға; **уче́ние ему́ не впрок** уға уҡыуҙан файҙа юҡ ♦ **идти́ впрок** файҙаға барыу (булыу)

**ВПРОСА́К: попа́сть(ся) впроса́к** уңайһыҙ хәлдә ҡалыу, уңайһыҙ хәлгә төшөү

**ВПРОСО́НКАХ** *нареч.*; *разг.* йоҡо аралаш, ууяныр-уянмаҫ; **впросо́нках слы́шать разгово́р** йоҡо аралаш һөйләшкәнде ишетеү

**ВПРО́ЧЕМ 1.** *союз противит.* әммә, ләкин, (шулай булыуға) ҡарамаҫтан; **ма́льчик не владе́л башки́рским языко́м, впро́чем о́бщий смысл ска́занного он ула́вливал** башҡорт телен белмәүгә ҡарамаҫтан, малай әйтелгәндең дөйөм мәгәнәһенә төшөнә ине **2.** *в знач. вводн. сл.* хәйер; **впро́чем, я не по́мню** хәйер, мин хәтерләмәйем

**ВПРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **впры́гнуть**

**ВПРЫ́ГНУТЬ** *сов. во что-л.*, *на что-л.* һикереү, һикереп инеү (төшөү); **впры́гнуть в ваго́н** вагонға һикереп инеү; **впры́гнуть в ло́дку** кәмәгә һикереү

**ВПРЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **впры́снуть**

**ВПРЫ́СНУТЬ** *сов. что* ебәреү, (укол) яһау (*тире аҫтына, венаға шприц менән шыйыҡлыҡ*); **впры́снуть больно́му лека́рство** ауырыуға дарыу ебәреү; **впры́снуть ка́мфору** камфара уколы яһау

**ВПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **впрячь**

**ВПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **впря́чься** **2.** *страд. от* **впряга́ть**

**ВПРЯМЬ** *частица*; *разг.* (*для подтверждения достоверности высказываемого*) ысынлап та, ысындан да, дөрөҫөндә лә; **и впрямь э́то де́ло хоро́шее** ысынлап та, был яҡшы эш

**ВПРЯСТЬ** *сов. что* ҡушып (аралаштырып) иләү; **впрясть шёлк в шерсть** йөнгә ебәк ҡушып иләү

**ВПРЯЧЬ** *сов. кого-что* егеү; **впрячь ло́шадь** ат егеү

**ВПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.* егелеү ♦ **впря́чься в рабо́ту** эшкә егелеү

**ВПУСК** *м* индереү, ебәреү, үткәреү; **впуск пассажи́ров на перро́н** пассажирҙарҙы перронға үткәреү; **впуск пу́блики в зал** халыҡты залға индереү

**ВПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **впусти́ть**

**ВПУСКНО́Й,** -ая, -ое **1.** инә (керә) торған; **впускно́й день в больни́це** дауаханала индерә торған көн; **впускна́я дверь** керә торған ишек **2.** индереү (керетеү) ...ы; **впускно́й шлюз** керетеү шлюзы

**ВПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* индереү, керетеү, ебәреү, үткәреү; **впусти́ть в помеще́ние** бинаға индереү; **впусти́ть пар в тру́бы** парҙы торбаларға ебәреү **2.** *что* тамыҙыу; **впусти́ть ка́пли в нос** танауға дарыу тамыҙыу

**ВПУСТУ́Ю** *нареч.*; *разг.* юҡҡа, бушҡа, әрәмгә; **стара́ться впусту́ю** юҡҡа тырышыу

**ВПУ́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* (*вплести*) ҡатнаштырып (сыуалтып) үреү, бәйләү **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* тарытыу (тарыҡтырыу), бутау, ҡатнаштырыу (*берәй эшкә*); **впу́тать в исто́рию** бер хәлгә тарытыу

**ВПУ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*запутаться*) сейәлеү, сейәлеп бөтөү, сыуалыу, сыуалып бөтөү; **ле́ска впу́талась в во́доросли** ҡармаҡ ебе ылымыҡҡа сейәлгән **2.** *перен.*, *разг.* буталыу, ҡатышыу, тарыу, тарығыу (*берәй эшкә*)

**ВПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **впу́тать**

**ВПУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **впу́таться** **2.** *страд. от* **впу́тывать**

**ВПЯ́ТЕРО** *нареч.* биш тапҡыр (рәт, мәртәбә), бишләтә; **заплати́ть впя́теро деше́вле** биш тапҡыр арзанырак түләү

**ВПЯТЕРО́М** *нареч.* бишәү, бишәүләп, бишәүләшеп; **пое́хать впятеро́м** бишәүләп китеү

**В-ПЯ́ТЫХ** *вводн. сл.* бишенсенән

**ВРАГ** *м* дошман; **кла́ссовый враг** синфи дошман

**ВРАЖДА́** *ж* дошманлыҡ, кенә, хаслыҡ; **пита́ть вражду́** *к кому-л. кемгәлер* дошманлыҡ һаҡлау

**ВРАЖДЕ́БНОСТЬ** *ж* дошманлыҡ, хаслыҡ (тойғоһо); **испы́тывать вражде́бность** хаслыҡ тойғоһо кисереү

**ВРАЖДЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дошманлыҡ ...ы, дошмандарса, дошман; **вражде́бное отноше́ние** дошманлыҡ мөнәсәбәте **2.** дошман ...ы, дошмандар ...ы, дошманлашыусы; **вражде́бные сто́роны** дошманлашыусы яҡтар

**ВРАЖДОВА́ТЬ** *несов.* дошманлашыу, дошман күреү, үҙ-ара дошман булыу; **враждова́ть друг с дру́гом** бер-береһе менән дошман булыу

**ВРА́ЖЕСКИЙ,** -ая, -ое дошман ...ы; **вра́жеская а́рмия** дошман ғәскәре

**ВРА́ЖИЙ,** -ья, -ье *фольк. см.* **вра́жеский**

**ВРАЗ** *нареч.*; *прост.* **1.** бергә, бер юлы, берҙәм; **ору́дия грохота́ли враз** орудиелар бер юлы гөрһөлдәне **2.** шунда уҡ, бик тиҙ; **опозна́ть враз** шунда уҡ таныу

**ВРАЗБИ́ВКУ** *нареч.*; *разг.* бүлгеләп, бүлеп-бүлеп, аралаштырып, тәртибен боҙоп; **спра́шивать вразби́вку табли́цу умноже́ния** ҡабатлау таблицаһын бүлеп-бүлеп һорау

**ВРАЗБРО́Д** *нареч.*; *разг.* айырым-айырым, тырым-тырағай, тарҡау, таралып, һибелеп; **де́йствовать вразбро́д** тырым-тырағай эш итеү

**ВРАЗБРО́С** *нареч.*; *разг.* таралып, тарҡау, сәселеп, һибелеп, айырым-айырым, башҡа-башҡа; **брёвна лежа́ли вразбро́с** бүрәнәләр таралып ята ине

**ВРАЗВА́ЛКУ** *нареч.*; *разг.* ауа-түнә, алпан-толпан, аушанлап; **он шёл вразва́лку** ул алпан-толпан бара ине

**ВРАЗНОБО́Й** *нареч.*; *разг.* тарҡау, айырым-айырым, ойошмаған хәлдә; **де́йствовать вразнобо́й** тарҡау эш итеү

**ВРАЗРЕ́З: идти́ вразре́з с** *чем* ҡаршы килеү (барыу), ҡаршы әйтеү

**ВРАЗРЯ́ДКУ** *нареч.*; *полигр.* ара ҡалдырып, һирәкләтеп, һирәкләп; **набра́ть вразря́дку** ара ҡалдырып йыйыу

**ВРАЗУМИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* аңлайышлыҡ

**ВРАЗУМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аңлайышлы; **вразуми́тельная речь** аңлайышлы телмәр

**ВРАЗУМИ́ТЬ** *сов. кого-что* аҡылға өйрәтеү (ултыртыу), аҡыл биреү, төшөндөрөү; **нам на́до его́ вразуми́ть** беҙгә уны аҡылға ултыртырға кәрәк

**ВРАЗУМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вразуми́ть**

**ВРА́КИ** *мн.*; *прост.* алдыҡ, ялған, ялған һүҙ, уйҙырма

**ВРАЛЬ** *м*; *разг.* алдаҡсы, ялғансы

**ВРАНЬЁ** *с*; *разг.* **1.** алдау, ялғанлау **2.** алдыҡ, ялған, юҡ һүҙ, уйҙырма

**ВРАСКА́ЧКУ** *нареч.*; *разг.* айҡала-сайҡала, бәүелеп, сайҡалып; **ходи́ть враска́чку** бәүелеп йөрөү

**ВРАСПЛО́Х** *нареч.* көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән, ҡапыл; **заста́ть врасплóх** көтмәгәндә килеп сығыу; **напа́сть врасплóх** көтмәгәндә һөжүм итеү

**ВРАССЫПНУ́Ю** *нареч.* төрлө яҡҡа, таралып, һибелеп, тырым-тырағай; **бежа́ть врассыпну́ю** тырым-тырағай йүгереү

**ВРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **врасти́**

**ВРАСТИ́** *сов.* **1.** эскә инеп үҫеү; **но́готь врос в па́лец** тырнаҡ бармаҡҡа инеп үҫкән **2.** һеңеү, батып инеү; **избу́шка вросла́ в зе́млю** өй ергә һеңеп киткән

**ВРАСТЯ́ЖКУ** *нареч.*; *разг.* **1.** һуҙылып, йәйелеп; **лежа́ть врастя́жку** һуҙылып ятыу **2.** һуҙып, һалмаҡ, яйлап; **произноси́ть слова́ врастя́жку** һүҙҙәрҙе һуҙып әйтеү

**ВРАТА́** *только мн.*; *уст.* ҡапҡа; **монасты́рские врата́** монастырь ҡапҡаһы

**ВРАТА́РЬ** *м*; *спорт.* ҡапҡасы

**ВРАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *что* и *без доп.* алдау, ялғанлау; **он не уме́ет врать** ул алдаша белмәй **2.** (*неверно показывать*) дөрөҫ күрһәтмәү, яңылыш йөрөү; **часы́ врут** сәғәт дөрөҫ күрһәтмәй **3.** хаталаныу, яңылышыу, көйҙө боҙоу (*йырҙа, музыкала*)

**ВРАЧ** *м* врач, табип; **гла́вный врач** баш врач

**ВРАЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое врачтар ...ы, табип ...ы; **враче́бная по́мощь** табип ярҙамы; **враче́бная коми́ссия** врачтар комиссияһы

**ВРАЧЕВА́ТЬ** *несов. кого-что*; *книжн.* дауалау; **врачева́ть люде́й** кешеләрҙе дауалау

**ВРАЩА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әйләнмәле, өйрөлмәле, әйләнмә, әйләнеү ...ы; **враща́тельное движе́ние** әйләнмәле хәрәкәт **2.** әйләндерә торған, әйләндереүсе, әйләндереү ...ы; **враща́тельная си́ла** әйләндереүсе көс

**ВРАЩА́ТЬ** *несов. что, чем* әйләндереү, өйрөлтөү; **враща́ть колесо́** тәгәрмәс әйләндереү; **вода́ враща́ет турби́ну** һыу турбинаны әйләндерә ♦ **враща́ть глаза́ми (белка́ми)** күҙҙәрҙе уйнатыу, күҙҙең ағын әйләндереп ҡарау

**ВРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** әйләнеү, өйрөлөү; **Земля́ враща́ется вокру́г Со́лнца** Ер Ҡояш тирәләй әйләнә **2.** *перен.* (*со словами "около", "вокруг"*) өйрөлөү; **мы́сли враща́лись вокру́г одно́й и той же те́мы** фекерҙәр бер үк тема тирәһендә өйрөлдө **3.** *перен.* булыу, аралашыу; **враща́ться в среде́ молодёжи** йәштәр мөхитендә булыу **4.** *страд. от* **враща́ть**

**ВРАЩЕ́НИЕ** *с см.* **враща́ть, враща́ться**

**ВРЕД** *м* зыян, зарар; **причини́ть вред** зарар килтереү

**ВРЕДИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** ҡорткос; **вреди́тели карто́феля** картуф ҡорткостары **2.** зыян итеүсе (килтереүсе)

**ВРЕДИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое ҡорткослоҡ; **вреди́тельская де́ятельность** ҡорткослоҡ ҡылыу

**ВРЕДИ́ТЕЛЬСТВО** *с* дошмансылыҡ, ҡортҡослоҡ; **занима́ться вреди́тельством** ҡортҡослоҡ менән шөғөлләнеү

**ВРЕДИ́ТЬ** *несов. кому-чему* зыян (зарар) килтереү; **куре́ние вреди́т здоро́вью** тәмәке тартыу сәләмәтлеккә зарар килтерә

**ВРЕ́ДНОСТЬ** *ж* зарар, зыянлыҡ; **вре́дность куре́ния** тәмәке тартыуҙың зарары

**ВРЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое зарарлы, зыянлы, алама, насар; **вре́дные при́меси** зарарлы ҡушылмалар; **вре́дная привы́чка** алама ғәҙәт

**ВРЕДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое зарарлы, зыянлы, зарар (зыян) килтерә торған; **вредоно́сные си́лы** зарарлы көстәр

**ВРЕ́ЗАТЬ** *сов. что* уйып ҡуйыу, ырып (соҡоп) урынлаштырыу; **вре́зать замо́к в дверь** ишеккә йоҙаҡ уйып ҡуйыу

**ВРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **вре́зать**

**ВРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.* **1.** йырып (ярып) инеү, барып төртөлөү (бәрелеү); **маши́на вре́залась в столб** машина бағанаға барып бәрелде; **ло́дка вре́залась в песо́к** кәмә ҡомға барып төртөлдө **2.** *перен.* инеп тороу, терәлеп тороу; **поля́на вре́залась в лес** аҡлан урманға терәлеп тора **3.** *перен.* бәреп инеү, бәреп килеп инеү; **вса́дник вре́зался в толпу́** һыбайлы халыҡ төркөмөнә бәреп килеп инде **4.** *перен.* (күңелдә, хәтерҙә) уйылып ҡалыу; **вре́заться в па́мять** хәтерҙә уйылып ҡалыу

**ВРЕЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вре́заться 2.** *страд. от* **вреза́ть**

**ВРЕЗНО́Й,** -ая, -ое уйып ҡуйылған, уйып ҡуйыла торған, уйылма; **врезно́й замо́к** уйып ҡуйыла торған йоҙаҡ

**ВРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **вре́зать**

**ВРЕ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вре́заться 2.** *страд. от* **вре́зывать**

**ВРЕМЕНА́МИ** *нареч.* ҡайһы саҡта, ваҡыт-ваҡыт, ара-тирә, ваҡыты менән; **времена́ми ста́рые ра́ны но́ют** ваҡыт-ваҡыт иҫке яралар һыҙлай

**ВРЕМЕННО́Й,** -ая, -ое ваҡыт ...ы; **временна́я после́довательность** ваҡыт эҙмә-эҙлелеге; **временна́я зави́симость** ваҡыт бәйлелеге

**ВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ваҡытлы; **вре́менная рабо́та** ваҡытлы эш **2.** ваҡытлыса; **вре́менная неуда́ча** ваҡытлыса уңышһыҙлыҡ

**ВРЕМЕНЩИ́К** *м* ваҡытлы хаким, ваҡытлы власть эйәһе

**ВРЕ́МЯ** *с* **1.** ваҡыт; **со́лнечное вре́мя** ҡояш ваҡыты; **вре́мя не ждёт** ваҡыт көтөп тормай; **тра́тить вре́мя** ваҡыт сарыф итеү **2.** (*час, срок*) сәғәт, ваҡыт; **ско́лько вре́мени?** сәғәт нисә?, ваҡыт күпме?; **в ука́занное вре́мя** күрһәтелгән ваҡытта; **вре́мя истекло́** ваҡыт үтеп китте **3.** (*эпоха, период*) ваҡыт, дәүер, осор, заман; **не отстава́ть от вре́мени** замандан артҡа ҡалмау; **вое́нное вре́мя** һуғыш ваҡыты; **дух вре́мени** заман рухы **4.** (*определённая пора*) миҙгел, мәл, саҡ, ваҡыт; **времена́ го́да** йыл миҙгелдәре; **вре́мя поко́са** бесән сабыу мәле, бесән өҫтө; **рабо́чее вре́мя** эш ваҡыты **5.** *грам.* заман; **настоя́щее вре́мя** хәҙерге заман; **бу́дущее вре́мя** киләсәк заман; **проше́дшее вре́мя** үткән заман ♦ **во вре́мя о́но** *уст.* ҡасандыр, әллә ҡасан; **вре́мя от вре́мени** ваҡыт-ваҡыт, ҡайһы берҙә; **(в) пе́рвое вре́мя** башта, тәүҙә, тәү ваҡытта; **(в) после́днее вре́мя** һуңғы ваҡытта; **в своё вре́мя**: 1) заманында, ҡасандыр; 2) үҙ ваҡытында; **всё вре́мя** һәр ваҡыт (саҡ), гел; **в ско́ром вре́мени** оҙаҡламай; **в то вре́мя как** шул арала, шул ғына ваҡыт араһында; **вы́играть вре́мя** күберәк ваҡыт алыу, ваҡыт үтеү, файҙаға булыу; **до вре́мени**; **до поры́ до вре́мени** ваҡыты еткәнсе, билдәле бер ваҡытҡа тиклем, көнө килгәнсе; **до сего́ вре́мени** ошо ваҡытҡа тиклем; **ко вре́мени** ваҡытлы, үҙ ваҡытында; **на вре́мя** ваҡытлыса, билдәле ваҡытҡа тиклем; **со вре́мени** ваҡыты етеү менән, киләсәктә; **одно́ вре́мя** бер ваҡыт; **ра́ньше вре́мени** көн элгәре (элек), ваҡытынан алда; **са́мое вре́мя** бик ваҡытлы; **с тече́нием вре́мени** ваҡыт үтеү менән, киләсәктә; **тем вре́менем** шул уҡ ваҡытта, шул арала; **уби́ть вре́мя** ваҡытты бушҡа уҙғарыу

**ВРЕМЯИСЧИСЛЕ́НИЕ** *с* ваҡыт иҫәбе, йыл иҫәбе

**ВРЕМЯ́НКА** *ж*; *разг.* **1.** (*переносная лестница*) күсереп йөрөтмәле баҫҡыс **2.** (*печка*) тимер мейес **3.** (*вре́менная постройка*) ваҡытлы ҡоролма, ваҡытлы торлаҡ

**ВРЕМЯПРЕПРОВОЖДЕ́НИЕ** *с* ваҡыт үткәреү (уҙғарыу), көн үткәреү (уҙғарыу)

**ВРО́ВЕНЬ** *нареч. с чем* тип-тиң, тигеҙ, бер тигеҙ; **идти́ вро́вень** тигеҙ барыу

**ВРО́ДЕ** *предлог* и *частица* **1.** *предлог с род. п.* (*обычно в сочет. с мест. "что-то", "нечто"*) кеүек, һымаҡ; **вро́де тебя́** һинең һымаҡ **2.** *частица*; *прост.* (*при указании на предположительность высказывания*) шикелле, булһа кәрәк; **вро́де он идёт** ул килә шикелле

**ВРОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое тыумыштан булған (килгән); **врождённый тала́нт** тыумыштан булған һәләт; **врождённые рефле́ксы** *физиол.* тыумыштан килгән рефлекстар

**ВРОЗЬ** *нареч.* айырым, айырым-айырым, айырым рәүештә; **жить врозь** айырым йәшәү ♦ **врозь идёт (пошло́ и т.д.)** татыу булмау, (эш) ырамау

**ВРУБ** *м*; *горн.* уйым, ярыҡ, тишек (*тау тоҡомдарында махсус яһалған*)

**ВРУБА́ТЬ** *несов. см.* **вруби́ть**

**ВРУБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вруби́ться 2.** *страд. от* **вруба́ть**

**ВРУБИ́ТЬ** *сов. что* уйып (соҡоп) индереп ҡуйыу, уйып (соҡоп) ултыртыу; **вруби́ть кося́к в сте́ну** стенаға уйып яңаҡ ултыртыу

**ВРУБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡырҡа-ҡырҡа инеү, ҡырҡып инеү (эсенә); **вруби́ться в тайгу́** ҡырҡа-ҡырҡа тайга эсенә инеү **2.** ҡылыс менән саба-саба бәреп инеү; **вруби́ться в неприя́тельские ряды́** дошман сафтарына ҡылыс менән саба-саба бәреп инеү **3.** *горн.* уйыу, (уйым, тишек, ярыҡ) яһау; **вруби́ться в ка́менную поро́ду** таш тоҡомон уйыу

**ВРУ́БОВЫЙ,** -ая, -ое *горн.* (тау тоҡомон) уя (тишә) торған, (тау тоҡомон) уйыу (тишеү) ...ы; **вру́бовая маши́на** тау тоҡомон тишеү машинаһы

**ВРУКОПА́ШНУЮ** *нареч.* уҫмаҡлашып, йоҙроҡ (штык) менән; **дра́ться врукопа́шную** уҫмаҡлашып һуғышыу

**ВРУН** *м* и **ВРУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* алдаҡсы, ялғансы

**ВРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **вручи́ть**

**ВРУЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** тапшырыу, биреү, ҡулына (ҡулға) тоттороу; **вручи́ть пове́стку** саҡырыу ҡағыҙын ҡулға тоттороу; **вручи́ть о́рден** орден тапшырыу **2.** *перен.* ышанып тапшырыу; **вручи́ть судьбу́ дете́й** балалар яҙмышын ышанып тапшырыу

**ВРУЧНУ́Ю** *нареч.* ҡулдан, ҡул менән; **обрабо́тка дета́лей вручну́ю** деталдәрҙе ҡул менән эшкәртеү

**ВРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **врыть**

**ВРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вры́ться 2.** *страд. от* **врыва́ть**

**ВРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **ворва́ться**

**ВРЫТЬ** *сов. что* ҡаҙып ултыртыу, соҡоп ултыртыу; **врыть столб в зе́млю** бағананы ергә ҡаҙып ултыртыу

**ВРЫ́ТЬСЯ** *сов. во что* ҡаҙып (соҡоп) инеү; **вры́ться в се́но** бесән араһына соҡоп инеү; **сапёры вры́лись в зе́млю** сапёрҙар ерҙе соҡоп инде

**ВРЯ́Д ЛИ** *частица* (*при выражении сомнения в достоверности высказываемого*) -мы/-ме икән, ай-һай; **вря́д ли он придёт** ул килерме икән

**ВС...** *приставка см.* **вз...**

**ВСАДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** сәнсеү, ҡаҙау, сәнсеп (сабып) ултыртыу; **всади́ть топо́р в бревно́** балтаны бүрәнәгә ултырта сабыу **2.** *разг.* атып тейҙереү; **всади́ть пу́лю в сте́ну** стенаға пуляны атып тейҙереү

**ВСА́ДНИК** *м* һыбайлы, атлы

**ВСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **всади́ть**

**ВСА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **всоса́ть**

**ВСА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **всоса́ться 2.** *страд. от* **вса́сывать**

**ВСЕ** *мн. мест. см.* **весь** I

**ВСЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "бөтә", "бөтәһен", "бөтөнөһөн эсенә алған", "ғөмүми", "дөйөм" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **всеми́рный** бөтә донъя; **всео́бщий** дөйөм, ғөмүми

**ВСЁ I** *нареч.*; *разг.* **1.** (*всё время, постоянно*) һаман, һәр ваҡыт, гел; **он всё рабо́тает** ул һаман эшләй **2.** (*до сих пор*) һаман, әле (лә) булһа; **дождь всё ещё идёт** ямғыр һаман да яуа **3.** (*только, именно*) тик, бары тик, фәҡәт ғына/генә; **всё зави́сит от дире́ктора** бары тик директорҙан тора **4.** *в знач. частицы* (*для усиления значений других частей речи*) торған һайын, барған һайын, тағы ла -раҡ/-рәк; **пого́да стано́вится всё лу́чше и лу́чше** көн торған һайын яҡшыра **5.** *в знач. союза*; *разг.* (*однако, всё-таки*) ләкин, әммә, барыбер, шулай ҙа; **как ни стара́ется, всё не выхо́дит** нисек кенә тырышмаһын, барыбер эше барып сыҡмай ♦ **всё ж**; **всё же** шулай ҙа, әммә

**ВСЁ II** *с мест. см.* **весь** I

**ВСЕВОЗМО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое һәр төрлө, төрлө-төрлө; **в универма́г поступи́ли всевозмо́жные това́ры** универмагка һәр төрлө тауар килде

**ВСЕВЫ́ШНИЙ** *м* Аллаһы тәғәлә

**ВСЕГДА́** *нареч.* **1.** һәр ваҡыт, һәр ҡасан, гел; **он всегда́ опря́тен** ул һәр ваҡыт ыҫпай **2.** мәңге, үлемһеҙ; **мате́рия существова́ла всегда́** материя мәңге йәшәгән

**ВСЕГДА́ШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* ғәҙәттәге, даими, һәр ваҡыт булған; **всегда́шняя любе́зность** ғәҙәттәге илгәҙәклек

**ВСЕГО́** *нареч.* **1.** бөтәһе, бары, бөтөнөһө, йыйыныһы, барлығы; **израсхо́довано всего́ сто рубле́й** барлығы йөҙ һум аҡса тотонолған **2.** *в знач. частицы* (*для указания на ограничение в количестве*; *часто в сочетании с "только", "лишь"*) ни бары, бары тик, ғына; **рабо́та начала́сь всего́ два ме́сяца тому́ наза́д** эш ни бары ике ай элек кенә башланды ♦ **всего́ хоро́шего**! хушығыҙ!, һау булығыҙ!, хуш!, һау бул!; **всего́-на́всего** бары тик, ни бары; **всего́ ничего́** бер нәмә лә юҡ тиерлек, бик әҙ; **то́лько и всего́** шул ғына, бары шул

**В-СЕДЬМЫ́Х** *вводн. сл.* етенсенән

**ВСЕЗНА́ЙКА** *м* и *ж*; *разг.*, *ирон.* белдекле булырға маташыусы, үтә белдекле

**ВСЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **всели́ть** 1, **всели́ться** 1; **вселе́ние в но́вый дом** яңы өйгә күсеү

**ВСЕЛЕ́ННАЯ** *ж* **1.** (*мироздание*) Йыһан, Ғаләм; **строе́ние Вселе́нной** Ғаләм төҙөлөшө **2.** (*вся земля*) ер йөҙө, донъя

**ВСЕЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* индереп урынлаштырыу, урынлаштырыу, күсенеү, индереү; **всели́ть жильцо́в в кварти́ру** кешеләрҙе фатирға урынлаштырыу **2.** *что*; *перен.* күңеленә һалыу, керетеү, тыуҙырыу, уятыу; **всели́ть наде́жду** өмөт уятыу

**ВСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** инеп урынлашыу, күсеү, инеү; **всели́ться в но́вую кварти́ру** яңы фатирға инеп урынлашыу **2.** *перен.* төшөү, инеү, тыуыу, урынлашыу; **наде́жда всели́лась в его́ се́рдце** уның күңелендә өмөт тыуҙы

**ВСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **всели́ть**

**ВСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **всели́ться 2.** *страд. от* **вселя́ть**

**ВСЕМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое һәр яҡлап, бөтә мөмкинлектәр менән, барлыҡ саралар менән; **всеме́рное соде́йствие** һәр яҡлап ярҙам итеү

**ВСЕ́МЕРО** *нареч.* ете тапҡыр (мәртәбә), етеләтә; **все́меро бо́льше** ете тапҡыр ҙурыраҡ; **все́меро деше́вле** етеләтә арзаныраҡ

**ВСЕМЕРО́М** *нареч.* етәү, етәүләшеп, етәүләтеп; **рабо́тать всемеро́м** етәүләшеп эшләү

**ВСЕМИ́РНО-ИСТОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое бөтә (бөтөн) донъя тарихы

**ВСЕМИ́РНЫЙ,** ая, -ое бөтә (бөтөн) донъя ...ы, бөтә донъя күләмендәге; **всеми́рная исто́рия** бөтә донъя тарихы; **всеми́рная изве́стность** бөтә донъяла танылыу

**ВСЕМОГУ́ЩЕСТВО** *с* сикһеҙ ҡеүәт, ҡөҙрәт; **всемогу́щество ра́зума** аҡыл ҡөҙрәте

**ВСЕМОГУ́ЩИЙ,** -ая, -ее сикһеҙ ҡеүәтле, ҡөҙрәтле; **всемогу́щий властели́н** ҡөҙрәтле хаким

**ВСЕНАРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое бөтә (бөтөн) халыҡ(тың) ...ы; **всенаро́дное де́ло** бөтә (бөтөн) халыҡ эше; **всенаро́дное торжество́** бөтә (бөтөн) халыҡ тантанаһы

**ВСЕО́БУЧ** *м* (*всеобщее обучение*) дөйөм мәжбүри уҡытыу, ғөмүми мәжбүри уҡытыу

**ВСЕО́БЩИЙ,** -ая, -ее дөйөм, ғөмүми; **всео́бщее избира́тельное пра́во** дөйөм һайлау хоҡуғы; **всео́бщий зако́н капиталисти́ческого накопле́ния** *эк.* капиталистик тупланыштың дөйөм законы (ҡануны)

**ВСЕО́БЩНОСТЬ** *ж* дөйөмлөк, ғөмүмилек

**ВСЕОБЪЕ́МЛЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** бөтөнөһөн эсенә алған; **всеобъе́млющие зада́чи** бөтөнөһөн эсенә алған бурыстар **2.** бөтөнөһөн аңлай торған; **всеобъе́млющий ум** бөтөнөһөн аңлай торған аң

**ВСЕОРУ́ЖИЕ: во всеору́жии**: 1) тулы ҡоралланған хәлдә, тулы ҡоралланып; **встре́тить врага́ во всеору́жии** дошманды тулы ҡоралланған хәлдә ҡаршылау; 2) камил эйә булып, камил белеп етеп, тулыһынса эҙер булып; **вы́ступить во всеору́жии зна́ний** белемгә камил эйә булып сығыш яһау

**ВСЕПОБЕЖДА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее бөтә нәмәне еңеүсе (еңә торған); **всепобежда́ющий ра́зум** бөтә нәмәне еңеүсе аң

**ВСЕПРОЩЕ́НИЕ** *с* бөтә нәмәне (барыһын да) ғәфү итеү

**ВСЕРОССИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое бөтә (бөтөн) Рәсәй ...ы; **Всеросси́йский съезд молодёжи** Бөтә (Бөтөн) Рәсәй йәштәр съезы

**ВСЕРЬЁЗ** *нареч.*; *разг.* **1.** ысынға, ысынлап; **принима́ть всерьёз** ысынға алыу **2.** ысынлап, төплө итеп, эшлекле рәүештә; **всерьёз принима́ться за учёбу** уҡыуға ысынлап тотоноу

**ВСЕСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һәр нәмәгә ҡөҙрәтле, ҙур власлы, тәьҫире ҙур, йоғонтоһо көслө

**ВСЕСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее һәр яҡлап (яҡтан), бөтә яҡлап, бөтөн яҡтан, ентекләп; **всесторо́ннее разви́тие челове́ка** кешенең һәр яҡлап үҫеүе

**ВСЁ-ТАКИ** и *разг.* **ВСЁ Ж ТАКИ** *союз* и *частица* **1.** *союз противит. обычно в сочет. с союзами "а", "и", "но"* (*тем не менее, однако*) шулай ҙа, шулай булһа ла, (шуға) ҡарамаҫтан, (шулай булыуға) ҡарамаҫтан, әммә; **е́хали бы́стро, но всё-таки опозда́ли** шәп барыуға ҡарамаҫтан, һуңланылар **2.** *частица* (*для выражения возражения предыдущему высказыванию*) шулай ҙа; **всё-таки я прав** шулай ҙа мин хаҡлы

**ВСЕУСЛЫ́ШАНИЕ: во всеуслы́шание** бөтә кеше ишетерлек итеп, ҡысҡырып, асыҡ итеп; **сказа́ть во всеуслы́шание** бөтә кеше ишетерлек итеп әйтеү

**ВСЕЦЕ́ЛО** *нареч.* бөтөнләй, бөтөнләйгә, тулыһынса, мөкиббән; **он всеце́ло пре́дан де́лу** ул эшкә мөкиббән бирелгән

**ВСЕЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое бөтә нәмәне ашаусы; **всея́дное живо́тное** бөтә нәмәне ашаусы хайуан

**ВСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **вскочи́ть**

**ВСКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **вскопа́ть**

**ВСКАРА́БКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* үрмәләп менеү (менеп етеү), тырмашып менеү; **вскара́бкаться на скалу́** ҡаяға үрмәләп менеү

**ВСКАРА́БКИВАТЬСЯ** *несов. см.* **вскара́бкаться**

**ВСКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **вскорми́ть**

**ВСКАЧЬ** *нареч.* сабып, саптырып; **нести́сь вскачь** елдереп сабыу, саптырып барыу

**ВСКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **вски́нуть**

**ВСКИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** күтәреп һалыу, күтәреп ташлау; **вски́нуть мешо́к на плечо́** тоҡто яурынға күтәреп һалыу **2.** тиҙ (кинәт) күтәреү; **вски́нуть ружьё** мылтыҡты кинәт күтәреү; **вски́нуть го́лову** башты кинәт күтәреү

**ВСКИПА́ТЬ** *несов. см.* **вскипе́ть**

**ВСКИПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡайнап сығыу, ҡайнау; **вода́ вскипе́ла** һыу ҡайнаны **2.** *перен.* ярһыу, ярһып китеү, ҡыҙыу, ҡыҙып китеү; **он вскипе́л от гне́ва** ул асыуынан ярһып китте

**ВСКИПЯТИ́ТЬ** *сов. что* ҡайнатыу, ҡайнатып алыу, ҡайнатып сығарыу; **вскипяти́ть во́ду** һыу ҡайнатып алыу

**ВСКЛОКО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое туҙғыған, өлтәйгән, ялбырлаған, ялбыраған; **всклоко́ченные во́лосы** туҙғыған сәс

**ВСКЛОКО́ЧИТЬ** *сов. что*; *разг.* туҙҙырыу, өлтәйтеү, ялбырландырыу, ялбыратыу

**ВСКЛОКО́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туҙғыу, өлтәйеү, ялбырлау

**ВСКОЛЫХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тулҡынландырыу, тирбәтеү, һелкетеү, сайҡалдырыу, тулҡынландырып (тирбәтеп, һелкетеп, сайҡалдырып) ебәреү; **ве́тер всколыхну́л рожь** ел арышты тулҡынландырҙы **2.** *кого-что*; *перен.* ҡуҙғатыу,

ҡуҙғытып ебәреү, тулҡынландырыу, хәрәкәткә килтереү; **революция всколыхну́ла все си́лы наро́дные** ихтилал халыҡтарҙың бөтә көсөн ҡуҙғатты

**ВСКОЛЫХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тулҡынланыу, тирбәлеү, һелкенеү, сайҡалыу, тулҡынланып (тирбәлеп, һелкенеп, сайҡалып) китеү, һелкенеп (сайҡалып) ҡуйыу; **вода́ в о́зере всколыхну́лась** күлдәге һыу тулҡынланып китте; **знамёна всколыхну́лись** байраҡтар тирбәлде **2.** *перен.* ҡуҙғалыу, тулҡынланыу, хәрәкәткә килеү; **страна́ всколыхну́лась** ил ҡуҙғалды

**ВСКО́ЛЬЗЬ** *нареч.* еңелсә, өҫтән-мөҫтән генә, һүҙ ыңғайында; **упомяну́ть вскользь** һүҙ ыңғайында әйтеп уҙыу

**ВСКОПА́ТЬ** *сов. что* ҡаҙыу; **вскопа́ть огоро́д** йәшелсә баҡсаһын ҡаҙыу

**ВСКО́РЕ** *нареч.* тиҙҙән, тиҙ арала, оҙаҡламай, бер аҙҙан; **он вско́ре верну́лся домо́й** ул оҙаҡламай өйгә әйләнеп ҡайтты

**ВСКОРМИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** (*животное, птицу и т.п.*) ашатып үҫтереү, ҡарап үҫтереү **2.** (*вырастить, воспитать*) тәрбиәләү, тәрбиәләп үҫтереү, ашатып-эсереп ҡарау (үҫтереү); **вскорми́ть ребёнка** баланы тәрбиәләп үҫтереү

**ВСКОЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** һикереп менеү, һикереп инеү; **вскочи́ть на коня́** атҡа һикереп менеү; **вскочи́ть в трамва́й на ходу́** китеп барған трамвайға һикереп инеү **2.** (*быстро встать*) тора һалыу, ырғып (һикереп) тороу; **вскочи́ть с ме́ста** урындан һикереп тороу **3.** *перен.*, *разг.* (*быстро возникнуть, вздуться*) сығыу, ҡалҡып сығыу, килеп сығыу; **ши́шка вскочи́ла на лбу** маңлайға шешек сыҡты

**ВСКРИ́КИВАТЬ** *несов. см.* **вскри́кнуть**

**ВСКРИ́КНУТЬ** *сов.* ҡысҡырып ебәреү, ҡапыл ҡысҡырыу

**ВСКРИЧА́ТЬ** *сов.*; *книжн.* ҡысҡырыу, һөрәнләү, ҡысҡырып өндәшеү

**ВСКРУЖИ́ТЬ: вскружи́ть го́лову** *кому* башын әйләндереү; **успе́х вскружи́л ему́ го́лову** уңыш уның башын әйләндерҙе

**ВСКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **вскрыть**

**ВСКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вскры́ться** **2.** *страд. от* **вскрыва́ть**

**ВСКРЫ́ТИЕ** *с* **1.** асыу, асып ҡарау; **вскры́тие пи́сем** хаттарҙы асып ҡарау; **вскры́тие недоста́тков** етешһеҙлектәрҙе асыу **2.** асылыу, әрселеү; **вскры́тие рек весно́й** яҙ көнө йылғаларҙың боҙҙан әрселеүе

**ВСКРЫТЬ** *сов. что* **1.** асыу, асып ҡарау; **вскрыть письмо́** хатты асып ҡарау **2.** *перен.* асыу, асып һалыу, фаш итеү; **вскрыть недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе асыу **3.** *мед.* ярыу, ярып ҡарау; **вскрыть труп** мәйетте ярыу; **вскрыть нары́в** шеште ярыу

**ВСКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ярылыу, тишелеү, һытылыу; **нары́в вскры́лся** шеш тишелде **2.** *перен.* асылыу, асыҡланыу, беленеү, фаш ителеү; **недоста́тки вскры́лись** кәмселектәр асылды; **вскры́лись причи́ны пораже́ния** еңелеүҙең сәбәптәре асыҡланды **3.** асылыу, боҙҙан әрселеү, боҙҙан асылыу; **Бе́лая вскры́лась** Ағиҙел боҙҙан әрселде **4.** *уст.* асылыу, асылып китеү; **ста́вни вскры́лись** тәҙрә ҡапҡастары асылды

**ВСЛАСТЬ** *нареч.*; *разг.* туйғансы, тәмләп, рәхәтләнеп; **налюбова́ться всласть** туйғансы һоҡланыу

**ВСЛЕД** *нареч.* **1.** *за кем-чем-л.* артынан, артынан уҡ, эҙенән; **вслед за пе́рвой коло́нной вы́ступила втора́я** беренсе колонна артынан икенсеһе сыҡты **2.** *в знач. предлога с дат. п.* артынан; **он смотре́л вслед по́езду** ул поезд артынан ҡарап ҡалды ♦ **вслед за тем** шунан һуң, һуңынан

**ВСЛЕ́ДСТВИЕ** *предлог с род. п.* сәбәпле, арҡаһында, нәтижәһендә, булғанлыҡтан, булыу сәбәпле, булғанға күрә; **он не мог яви́ться всле́дствие боле́зни** ул ауырыу сәбәпле килә алманы

**ВСЛЕПУ́Ю** *нареч.*; *разг.* **1.** күрмәйенсә, ҡарамайынса, тоҫмаллап, тоҫмал менән, юҫыҡлап, юҫыҡ менән; **печа́тать на маши́нке вслепу́ю** машинкала ҡарамайынса баҫыу; **игра́ть вслепу́ю** (*в шахматы, шашки*) ҡарамайынса уйнау; **лете́ть вслепу́ю** (*о самолёте*) тоҫмаллап осоу **2.** *перен.* тоҫмал менән, тоҫмаллап, тикшермәйенсә, белмәйенсә; **де́йствовать вслепу́ю** белмәйенсә эш итеү

**ВСЛУХ** *нареч.* ҡысҡырып, ишеттереп; **чита́ть вслух** ҡысҡырып уҡыу

**ВСЛУ́ШАТЬСЯ** *сов. во что* иғтибар менән тыңлау, ҡолаҡ һалыу; **вслу́шаться в разгово́р** һөйләшеүгә ҡолаҡ һалыу

**ВСЛУ́ШИВАТЬСЯ** *несов. см.* **вслу́шаться**

**ВСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов. см.* **всмотре́ться**

**ВСМОТРЕ́ТЬСЯ** *сов. во что* текләү, текләп ҡарау, ентекләп ҡарау

**ВСМЯ́ТКУ** *нареч.* бешер-бешмәҫ, ҡаты итмәй (*йомортҡаға ҡарата*); **яйцо́ всмя́тку** бешер-бешмәҫ йомортҡа

**ВСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **всу́нуть**

**ВСО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **всу́нуться** **2.** *страд. от* **всо́вывать**

**ВСОСА́ТЬ** *сов. что* һурып алыу, (эскә) һурыу, һеңдереү; **всоса́ть вла́гу** дымды һурып алыу ♦ **всоса́ть с молоко́м (ма́тери)** инә һөтө менән инеү, бәләкәйҙән өйрәнеү

**ВСОСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һеңеү, һеңеп бөтөү; **вода́ всоса́лась в зе́млю** һыу ергә һеңде **2.** ҡаҙалыу, йәбешеү, тәрәнгә инеү; **клещ всоса́лся в те́ло** тәнгә талпан ҡаҙалған

**ВСПА́ИВАТЬ** *несов. см.* **вспои́ть**

**ВСПА́РЫВАТЬ** *несов. см.* **вспоро́ть**

**ВСПАХА́ТЬ** *сов. что* һөрөү; **вспаха́ть по́ле** баҫыуҙы һөрөп сығыу

**ВСПА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **вспаха́ть**

**ВСПА́ШКА** *ж* һөрөү; **глубо́кая вспа́шка** тәрән һөрөү; **зя́блевая вспа́шка** туңға һөрөү

**ВСПЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **вспе́нить**

**ВСПЕ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вспе́ниться** **2.** *страд. от* **вспе́нивать**

**ВСПЕ́НИТЬ** *сов. что* күбекләндереү, күбекләү, күпертеү; **вспе́нить во́ду** һыу күбекләндереү

**ВСПЕ́НИТЬСЯ** *сов.* (күтәрелеп) күбекләнеү, күперекләнеү, күпереү; **пи́во вспе́нилось** һыра күбекләнде

**ВСПЛАКНУ́ТЬ** *сов. о ком-чём* и *без доп.*; *разг.* илап (һыҡтап) алыу, күҙ йәше сығарыу

**ВСПЛЕСК** *м* **1.** *см.* **всплесну́ть** **2.** (*шум, звук*) сәпелдәү, шапылдау (*тауыш*); **всплеск вёсел** ишкәктәрҙең сәпелдәүе

**ВСПЛЕ́СКИВАТЬ** и **ВСПЛЁСКИВАТЬ** *несов. см.* **всплесну́ть**

**ВСПЛЕСНУ́ТЬ** *сов.* сәпелдәтеү, сайпылтыу, сайпылдырыу ♦ **всплесну́ть рука́ми** ҡулды сабыу (*ғәжәпләнеүҙән, аптырауҙан*)

**ВСПЛЕСНУ́ТЬСЯ** *сов.* (юғарыға, өҫкә ҡарай) сайпылыу, һирпелеү (*һыу, шыйыҡлыҡ*)

**ВСПЛОШНУ́Ю** *нареч.*; *разг.* тотош; **луга́ всплошну́ю покры́ты цвета́ми** болондар тотош сәскә менән ҡапланған

**ВСПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **всплыть**

**ВСПЛЫТЬ** *сов.* **1.** (һыу өҫтөнә, өҫкә) ҡалҡыу, (һыу өҫтөнә, өҫкә) ҡалҡып сығыу; **подво́дная ло́дка всплыла́** һыу аҫты кәмәһе өҫкә ҡалҡып сыҡты **2.** *перен.* асылыу, беленеү, килеп сығыу; **недоста́тки всплы́ли** етешһеҙлектәр асылды

**ВСПОИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** (һөт) эсереү, (һөт) эсереп үҫтереү; **вспои́ть телёнка** быҙауҙы һөт эсереп үҫтереү **2.** (*вырастить, воспитать*) ҡарап (тәрбиәләп) үҫтереү; **она́ вспои́ла, вскорми́ла сестру́** ул һеңлеһен тәрбиәләп үҫтерҙе

**ВСПОЛО́ХИ** *мн.* (*ед.* **всполо́х** *м*) **1.** йәшен, һаҙағай уты **2.** көслө ялҡын, ут

**ВСПОЛОШИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ығы-зығы килтереү (ҡуптарыу, тыуҙырыу), борсоу һалыу, тынысһыҙлау, борсоу

**ВСПОЛОШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ығы-зығы килеү (ҡубыу, тыуыу), тынысһыҙланыу, борсолоу, зыҡ ҡубыу; **на дере́вьях всполоши́лись грачи́** ағас башындағы ҡара ҡарғалар зыҡ ҡупты

**ВСПОМИНА́ТЬ** *несов. см.* **вспо́мнить**

**ВСПОМИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вспо́мниться** **2.** *страд. от* **вспомина́ть**

**ВСПО́МНИТЬ** *сов. кого-что* иҫләү, иҫкә төшөрөү (алыу), хәтергә төшөрөү (алыу); **вспо́мнить про́шлое** үткәнде иҫкә төшөрөү

**ВСПО́МНИТЬСЯ** *сов. кому* иҫкә (хәтергә) төшөү; **мне вспо́мнилась одна́ пе́сня** бер йыр минең иҫемә төштө

**ВСПОМОГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ярҙамсы, өҫтәмә; **вспомога́тельный отря́д** ярҙамсы отряд; **вспомога́тельная литерату́ра** өҫтәмә әҙәбиәт ♦ **вспомога́тельный глаго́л** *грам.* ярҙамсы ҡылым

**ВСПОРО́ТЬ** *сов. что*; *разг.* һүтеү, ярыу, һүтеп ебәреү, ярып ебәреү; **вспоро́ть мешо́к** тоҡто һүтеү; **вспоро́ть брю́хо медве́дю** айыуҙың ҡорһағын ярып ебәреү

**ВСПОРХНУ́ТЬ** *сов.* (тиҙ генә) осоп күтәрелеү, (ҡапыл) осоп китеү; **пти́чка вспорхну́ла** ҡошсоҡ ҡапыл осоп китте

**ВСПОТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** тирләү, тиргә батыу, тир менән ҡапланыу; **ло́шадь бы́стро вспоте́ла** ат тиҙ генә тирләне **2.** быуланыу, тирләү; **окно́ вспоте́ло** тәҙрә быуланған

**ВСПРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **вспры́гнуть**

**ВСПРЫ́ГНУТЬ** *сов.* һикереү, һикереп менеү; **вспры́гнуть на ло́шадь** атҡа һикереп менеү

**ВСПРЫ́СКИВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **вспры́скивать** **2.** *разг.* (*впрыскиваемая жидкость*) бөркөлгән (һибелгән) шыйыҡлыҡ

**ВСПРЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **вспры́снуть**

**ВСПРЫ́СНУТЬ** *сов. что* **1.** һыу бөркөү, һыу һибеү; **вспры́снуть цветы́ водо́й** сәскәләргә һыу бөркөү **2.** *перен., прост.* (*отметить угощением, выпивкой*) йыуыу, билдәләп үтеү

**ВСПУ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **вспугну́ть**

**ВСПУГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡурҡытыу, ҡурҡытып ебәреү, ҡуҙғатыу; **вспугну́ть пти́чек** ҡошсоҡтарҙы ҡурҡытыу

**ВСПУХА́ТЬ** *несов. см.* **вспу́хнуть**

**ВСПУ́ХНУТЬ** *сов.* шешеү, ҡабарыу, бүртеү, ҡабарып китеү, ҡабарып (шешеп) сығыу; **уши́бленное ме́сто вспу́хло** бәрелгән урын шешеп сыҡты

**ВСПУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вспу́чить**

**ВСПУ́ЧИТЬ** *сов. что безл.*; *разг.* күбеү, күбеп сығыу, ҡабарыу, ҡабарып сығыу; **живо́т вспу́чило** эс күпте

**ВСПУ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күбеү, күбенеү, ҡабарыныу, ҡабарып (күбеп) сығыу, күтәрелеү; **лёд вспу́чился** боҙ күтәрелгән

**ВСПЫЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* (ҡапыл) туҙып китеү, ҡыҙып (ярһып, ҡабынып) китеү; **ба́бушка вспыли́ла из-за ничего́** өләсәй буштан ғына ҡыҙып китте

**ВСПЫ́ЛЬЧИВОСТЬ** *ж* яндырайлыҡ, ҡыҙыулыҡ, ҡыҙыу ҡанлылыҡ; **отлича́ться вспы́льчивостью** яндырайлыҡ менән айырылып тороу

**ВСПЫ́ЛЬЧИВЫЙ,** -ая, -ое яндырай, ҡыҙыу, ҡыҙыу ҡанлы; **вспы́льчивый челове́к** яндырай кеше; **вспы́льчивый хара́ктер** ҡыҙыу холоҡ

**ВСПЫ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **вспы́хнуть**

**ВСПЫ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** (*загореться*) (ҡапыл) тоҡаныу, тоҡанып (ҡабынып) китеү, ҡабыныу, янып китеү, яна башлау; **по́рох вспы́хнул** дары тоҡанып китте **2.** балҡыу, яҡтырыу, балҡып (яҡтырып) китеү, балҡып (яҡтырып) күренеү;

**вспы́хнули автомоби́льные фа́ры** автомобиль фаралары яҡтырып китте; **я́ркие звёзды вспы́хнули на не́бе** күктә яҡты йондоҙҙар балҡып китте **3.** (*покраснеть*) ҡыҙарыу, ҡыҙарып китеү; **вспы́хнуть от смуще́ния** оялыуҙан ҡыҙарыу **4.** ҡапыл башланып (тоҡанып, ҡабынып) китеү; **вспы́хнула война́** һуғыш башланып китте **5.** тоҡаныу, ҡыҙып (ярһып, тоҡанып) китеү; **вспы́хнуть от оби́ды** үпкәләүҙән ҡыҙып китеү

**ВСПЫ́ШКА** *ж* **1.** гөлт итеп ҡабынып (тоҡанып) китеү, яҡтырып (балҡып) китеү, дөрләп китеү (*яҡтылыҡ, ут*); **вспы́шка по́роха** дарының гөлт итеп, тоҡанып китеүе; **вспы́шка мо́лнии** йәшендең балҡып китеүе **2.** (*внезапное возмущение*) ҡыҙып (ярһып) китеү, тоҡанып (ҡабынып) китеү, тоҡаныу; **вспы́шка гне́ва** асыу тоҡанып китеү

**ВСПЯТЬ** *нареч.*; *книжн.* артҡа, кирегә; **поверну́ть вспять** кирегә бороу

**ВСТАВА́НИЕ** *с см.* **встать**; **почти́ть па́мять встава́нием** аяғүрә баҫып иҫкә алыу

**ВСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **встать** ♦ **не встава́я** баш ҡалҡытмай (күтәрмәй)

**ВСТА́ВИТЬ** *сов. что* **1.** ҡуйыу, өҫтәп ҡуйыу, индереп ҡуйыу; **вста́вить дно ведра́** биҙрә төпләү, биҙрәгә төп ҡуйыу; **вста́вить стекло́ в ра́му** тәҙрә рамына быяла ҡуйыу; **вста́вить в текст пропу́щенное сло́во** тексҡа төшөп ҡалған һүҙҙе өҫтәп ҡуйыу; **вста́вить зу́бы** теш ҡуйыу **2.** ҡыҫтырыу, ҡатыштырыу; **вста́вить сло́во в разгово́р** һөйләшкәндә һүҙ ҡыҫтырыу

**ВСТА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **вста́вить**; **вста́вка стёкол** быяла ҡуйыу **2.** (*вписанный текст*) өҫтәлмә, өҫтәмә текст **3.** (*то, что вставлено*) ялғау, ҡыйыҡ; **пла́тье с кружевно́й вста́вкой** селтәр ҡыйыҡ ҡуйылған күлдәк

**ВСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вста́вить** ♦ **вставля́ть па́лки в колёса** тәгәрмәскә таяҡ тығыу (*камасаулау*)

**ВСТАВНО́Й,** -ая, -ое алынмалы, алынма, ҡуйылған; **вставны́е две́рцы** алынмалы ишектәр

**ВСТАРЬ** *нареч.* борон, элек, борон (элекке) заманда; **встарь всё бы́ло не так** элек бөтәһе лә былай булмаған

**ВСТАТЬ** *сов.* **1.** тороу, баҫыу, тороп баҫыу, аяғүрә (аяҡҡа) баҫыу; **встать с ме́ста** урындан тороу; **встать на́ ноги** *прям., перен.* аяғына баҫыу (тороу), аяҡҡа баҫыу; **он встал** ул аяғүрә баҫты; **встать ра́но** иртә тороу (*после сна*) **2.** аяҡҡа баҫыу, һауығыу; **по́сле до́лгой боле́зни он встал** ул оҙаҡ ауырығандан һуң аяҡҡа баҫты **3.** (*о растениях*) үҫеү, күтәрелеү, ҡалҡыу; **камыши́ вста́ли стено́й** ҡамыштар стена булып ҡалҡты; **пшени́ца вста́нет** бойҙай күтәреләсәк **4.** (*подняться на борьбу*) күтәрелеү; **встать на защи́ту Ро́дины** Ватанды һаҡларға күтәрелеү **5.** (*взойти*) сығыу, ҡалҡыу, тыуыу, атыу; **со́лнце вста́ло** ҡояш сыҡты; **вста́ла заря́** таң атты **6.** *перед кем-чем*; *перен.* (*возникнуть, появиться*) килеп тыуыу (сығыу, баҫыу); **встал вопро́с** мәсьәлә килеп тыуҙы; **вста́ли но́вые тру́дности** яңы ауырлыҡтар килеп сыҡты **7.** *куда-л., на что-л.*; *разг.* баҫыу, тороу; **встать на ковёр** келәмгә баҫыу **8.** *разг.* (*уместиться*) урынлашыу, һыйыу; **шкаф здесь не вста́нет** шкаф бында һыймаҫ **9.** (*приступить к какой-л. работе*) тороу, баҫыу; **встать за стано́к** станок артына баҫыу **10.** *разг.* (*остановиться*) йөрөмәй (эшләмәй) башлау, туҡтау, туҡталыу; **часы́ вста́ли** сәғәт туҡтаған **11.** *разг.* (*покрыться льдом*); **Бе́лая вста́ла** Ағиҙел туңған ♦ **встать гру́дью** күкрәк менән ҡаршы тороу; **встать в строй** сафҡа баҫыу; **встать на кварти́ру** фатирға сиратҡа баҫыу; **встать на путь** *чего* или *какой* юлына баҫыу, юлға баҫыу; **встать на сто́рону** *чью-л. кемдеңдер* яғына баҫыу, кем яҡлылыр булып китеү; **встать на учёт** иҫәпкә баҫыу (инеү); **встать поперёк доро́ги** юлға арҡыры төшөү; **встать с ле́вой ноги́** һул аяҡтан тороу (*кәйеф булмау, уңмау*)

**ВСТОПО́РЩИТЬ** *сов. что*; *разг.* тырпайтыу, ҡабартыу, тырпайтып (ҡабартып) ебәреү; **встопо́рщить усы́** мыйыҡтарын тырпайтыу

**ВСТОПО́РЩИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тырпайыу, ҡабарыу, тырпайып (ҡабарып) китеү; **во́лосы встопо́рщились** сәстәр тырпайҙы

**ВСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **встро́ить**

**ВСТРЕВО́ЖИТЬ** *сов. кого-что* борсоу, шом (борсоу) һалыу, шомландырыу, тынысһыҙлау; **встрево́жить дома́шних** өйҙәгеләрҙе борсоу

**ВСТРЕВО́ЖИТЬСЯ** *сов.* борсолоу, шомланыу, тынысһыҙланыу; **взро́слые встрево́жились за дете́й** өлкәндәр балалар өсөн борсолдо

**ВСТРЁПАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **встрепа́ть 2.** *прил.* тырпаҡ, туҙған, өлтөк; **встрёпанные во́лосы** туҙған сәс

**ВСТРЕПА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* тырпайтыу, туҙҙырыу, өлтәйтеү, болартыу; **встрепа́ть во́лосы** сәсте туҙҙырыу

**ВСТРЕПЕНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** талпыныу, һелкенеү, ҡағыныу, һелкенеп (ҡағынып, талпынып) ҡуйыу; **пти́ца встрепену́лась** ҡош талпынып ҡуйҙы **2.** (*вздрогнуть*) һиҫкәнеү, дерелдәү, һиҫкәнеп ҡуйыу; **старик встрепену́лся** ҡарт һиҫкәнеп китте **3.** (*забиться быстрее — о сердце*) дөп-дөп тибә башлау

**ВСТРЁПКА** *ж*; *прост.* шелтә, шелтәләү, әрләү, орошоу; **зада́ть встрёпку** шелтәләү

**ВСТРЕ́ТИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* осратыу, тап итеү, тура килтереү; **встре́тить на доро́ге** юлда осратыу; **встре́тить его́ взгляд** уның ҡарашын тап итеү **2.** *перен.* (*получать, испытать*) *что* алыу, күреү, тойоу; **встре́тить подде́ржку** ярҙам алыу; **встре́тить отпо́р** отпор алыу **3.** *кого-что* ҡаршылау, ҡаршы алыу; **встре́тить госте́й** ҡунаҡтарҙы ҡаршылау; **встре́тить деле́гацию на**

**аэродро́ме** аэродромда делегацияны ҡаршы алыу **4.** *кого-что* (*принять, ответить чем-л.*) ҡабул итеү, яуап биреү; **пу́блика встре́тила аплодисме́нтами** халыҡ алҡыштар менән ҡабул итте

**ВСТРЕ́ТИТЬСЯ** *сов.* **1.** *с кем-чем* осрашыу, осрау, тап итеү, тап (булыу) килеү; **встре́титься со знако́мыми** таныштар менән осрашыу; **встре́тились взо́рами** ҡараштары тап килде; **встре́титься с затрудне́ниями** ҡыйынлыҡтарға осрау **2.** (*увидеться*) күрешеү, осрашыу; **влюблённые встре́тились** ғашиҡтар осрашты

**ВСТРЕ́ЧА** *ж* **1.** осрашыу; **неожи́данная встре́ча** көтөлмәгән осрашыу; **поздоро́ваться при встре́че** осрашҡанда иҫәнләшеү; **ве́чер встре́чи** *с кем-л. кем менәндер* осрашыу кисәһе **2.** ҡаршылау, ҡаршы алыу; **встре́ча делега́тов** делегаттарҙы ҡаршылау **3.** (*торжество*) ҡаршы алыу, байрам итеү; **встре́ча Но́вого го́да** Яңы йылды ҡаршы алыу

**ВСТРЕЧА́ТЬ** *несов. см.* **встре́тить**

**ВСТРЕЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **встре́титься**

**ВСТРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаршы, ҡаршы килгән; **встре́чный ве́тер** ҡаршы ел; **встре́чный по́езд** ҡаршы килгән поезд **2.** *в знач. сущ.* **встре́чный** *м* и **встре́чная** *ж* осраған кеше, тап булған (булыусы) кеше **3.** (*находящийся на пути*) осраған, тап килгән, тап килеүсе, ҡапма-ҡаршы **4.** (*ответный*) ҡаршы, ҡаршы яуап ...ы; **встре́чный иск** *юр.* ҡаршы дәғүә; **встре́чный план** ҡаршы яуап планы ♦ **встре́чный и попере́чный** осраған бер кеше; **пе́рвый встре́чный** осраҡлы кеше

**ВСТРО́ИТЬ** *сов. что* эсенә индереп һалыу (эшләү); **встро́ить шкаф в сте́ну** шкафты стенаға индереп эшләү

**ВСТРЯ́СКА** *ж* **1.** *разг.* ҡаты борсолоу, хәсрәтләнеү **2.** *прост.* (*наказание*) орош, шелтә, шелтәләү, әрләү, орошоу

**ВСТРЯ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **встряхну́ть**

**ВСТРЯ́ХИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **встряхну́ться 2.** *страд. от* **встря́хивать**

**ВСТРЯХНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡағыу, һелкеү, ҡағып (һелкеп) алыу; **встряхну́ть пала́с** балаҫ ҡағыу; **встряхну́ть останови́вшиеся часы́** туҡтаған сәғәтте һелкеү **2.** (*вызвать сотрясение*) һелкетеү, ҡалтыратыу, тетрәтеү; **взрыв встряхну́л зе́млю** шартлау ерҙе һелкетте **3.** *безл.* һелкетеү; **каре́ту встря́хнуло** каретаны һелкетте **4.** *перен.* уятыу, күтәреү, ҡуҙғатыу, ҡуҙғатып ебәреү; **револю́ция встряхну́ла наро́ды** ихтилал халыҡтарҙы ҡуҙғатып ебәрҙе

**ВСТРЯХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡағыныу, һелкенеү, елпенеү, ҡағынып (һелкенеп) ҡуйыу; **соба́ка встряхну́лась** эт һелкенде **2.** *перен., разг.* (*ободриться*) күңелләнеү, дәртләнеү, һелкенеп алыу **3.** *перен.* (*развлечься*) күңел асыу, күңел күтәреү

**ВСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **вступи́ть**

**ВСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **вступи́ться**

**ВСТУПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** инеш, инеш ...ы; **вступи́тельное сло́во** инеш һүҙ; **вступи́тельная часть** инеш өлөш **2.** инеү ...ы; **вступи́тельный взнос** инеү взносы; **вступи́тельный экза́мен** инеү имтиханы

**ВСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *куда* инеү, барып инеү, килеп инеү; **войска́ вступи́ли в го́род** ғәскәр ҡалаға инде **2.** күсеү; **вступи́ть в но́вую фа́зу разви́тия** үҫештең яңы фазаһына күсеү **3.** *куда* (аяҡ) баҫыу; **вступи́ть в гря́зную лу́жу** бысраҡ күләүеккә баҫыу **4.** *во что* инеү; **вступи́ть в па́ртию** партияға инеү **5.** *с предлогом "в"* башлау, керешеү, ҡатнашыу, тотоноу, булыу; **вступи́ть в перегово́ры** һөйләшеүҙәр башлау; **вступи́ть в поле́мику** бәхәстә ҡатнашыу; **вступи́ть во владе́ние** *чем-л. нимәгәлер* эйә булыу ♦ **вступи́ть в брак** никахҡа инеү, өйләнеү (кейәүгә сығыу); **вступи́ть в свои́ права́** үҙ хоҡуғына инеү; **вступи́ть в си́лу** көсөнә (ғәмәлгә) инеү; **вступи́ть в строй**: 1) *о ком-л.* кереү, ҡушылыу, өҫтәлеү; 2) *о чём-л.* сафҡа инеү (баҫыу); **вступи́ть на путь** *чего, какой* юлға баҫыу

**ВСТУПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *за кого-что* яҡлау, яҡлашыу, аралау; **вступи́ться за ребёнка** баланы яҡлау **2.** *прост.* (*вмешаться*) ҡатнашыу, ҡыҫылыу; **вступи́ться в разгово́р** һөйләшеүгә ҡыҫылыу

**ВСТУПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вступи́ть**; **вступле́ние во́йска в го́род** ғәскәрҙең ҡалаға инеүе **2.** инеш, баш; **вступле́ние к рома́ну** романға инеш; **вступле́ние к ва́льсу** вальстың башы

**ВСУ́НУТЬ** *сов. что, во что* тығыу, ҡыҫтырыу; **всу́нуть ру́ки в карма́ны** ҡулдарҙы кеҫәгә тығыу

**ВСУ́НУТЬСЯ** *сов.*; *прост.* **1.** (*просунуться куда-л.*) тығылыу, ҡыҫтырылыу, ҡыҫылышып инеү **2.** (*вмешиваться во что-л.*) ҡыҫтырылыу, тығылып йөрөү (*кәрәкмәгәндә*)

**ВСУХОМЯ́ТКУ** *нареч.*; *разг.* ҡоролай, ҡоро; **съесть за́втрак всухомя́тку** иртәнге ашты ҡоролай ашау ♦ **пита́ться (есть) всухомя́тку** ҡороһары менән туҡланыу

**ВСУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **всучи́ть**

**ВСУЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* сиратыу, ҡушып (ҡыҫтырып) сиратыу; **всучи́ть щети́ну в дра́тву** ҡылды еп осона ҡыҫтырып сиратыу **2.** *кого-что*; *перен., прост.* (*вынудить взять*) көсләп тағыу, көсләп биреү (тоттороу); **вме́сто мы́ла всучи́ть порошо́к** һабын урынына көсләп онтаҡ тоттороу

**ВСХЛИ́ПНУТЬ** *сов.* һулҡылдап ҡуйыу

**ВСХЛИ́ПЫВАНИЕ** *с см.* **всхли́пывать**

**ВСХЛИ́ПЫВАТЬ** *несов.* һулҡылдау, һулҡылдап илау; **она́ то́лько всхли́пывала** ул тик һулҡылдай ине

**ВСХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **взойти́**

**ВСХО́ДЫ** *только мн.* сығыш, шытым; **всхо́ды хлебо́в** игендәрҙең сығышы; **всхо́ды ози́мых хоро́шие** ужымдарҙың сығышы яҡшы

**ВСХО́ЖЕСТЬ** *ж*; *с.-х.* сығыш; **определе́ние всхо́жести семя́н** орлоҡтарҙың сығышын билдәләү

**ВСХО́ЖИЙ,** -ая, -ее *с.-х.* шытымлы; **всхо́жие семена́** шытымлы орлоҡтар

**ВСХРАПНУ́ТЬ** *сов.* **1.** (*о животном*) бышҡырып ҡуйыу, бышҡырып ебәреү **2.** *разг., шутл.* (*поспать*) серем итеп алыу, әҙ генә йоҡлап алыу

**ВСХРА́ПЫВАТЬ** *несов.* **1.** (*о человеке*) хырылдау, хырылдап (хырлап) йоҡлау **2.** (*о лошади*) бышҡырыу, бышҡырып тороу

**ВСЫ́ПАТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* һалыу, тултырыу; **всы́пать овёс в мешо́к** тоҡҡа һоло тултырыу **2.** *кому*; *перен., разг.* һуғыу, биргеләү, һуғып (биргеләп) алыу, әрләү, орошоу

**ВСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **всы́пать** 1

**ВСЮ́ДУ** *нареч.* һәр ерҙә, һәр ҡайҙа, бөтә урында

**ВСЯ** *ж мест. см.* **весь** I

**ВСЯ́КИЙ,** -ая, -ое *мест.* (*каждый*) һәр; **вся́кий раз** һәр ваҡыт **2.** (*разный*) һәр төрлө; **вся́кие кни́ги** һәр төрлө китаптар **3.** бер ниндәй, һис ниндәй, һис бер; **отсу́тствие вся́кой иде́и** бер ниндәй идеяның да булмауы; **без вся́кого сожале́ния** һис бер үкенесһеҙ **4.** *в знач. сущ.* **вся́кий** *м* и **вся́кая** *ж* һәр кем, һәр бер кеше; **вся́кий мо́жет э́то сде́лать** быны һәр кем эшләй ала. **5.** *в знач. сущ.* **вся́кое** *с* төрләһе, төрлө нәмә, төрлө хәл; **лю́ди вся́кое говоря́т** кешеләр төрләһен һөйләй; **вся́кое быва́ет** төрлө хәлдәр була ♦ **вся́кая вся́чина** *см.* **вся́чина**; **во вся́ком слу́чае** һәр хәлдә; **на вся́кий слу́чай** кәрәк була ҡалһа

**ВСЯ́КО** *нареч.*; *прост.* төрлөсә; **вся́ко быва́ет** төрлөсә була

**ВСЯ́ЧЕСКИ** *нареч.*; *разг.* төрлөсә, төрлө юлдар менән, бөтә саралар менән; **вся́чески стара́ться** төрлөсә тырышып ҡарау

**ВСЯ́ЧИНА: вся́кая вся́чина** эллә нәмәләр, теләһә нәмәләр, төрлө нәмәләр

**ВТА́ЙНЕ** *нареч.* йәшерен, йәшертеп, йәшерен рәүештә; **держа́ть вта́йне** *что-л.* *нимәнелер* йәшереп тотоу

**ВТА́ЛКИВАТЬ** *несов. см.* **втолкну́ть**

**ВТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **втопта́ть**

**ВТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **втащи́ть**

**ВТА́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **втащи́ться** **2.** *страд. от* **вта́скивать**

**ВТАЧА́ТЬ** *сов. что*; *портн.* эләктереп тегеп сығыу (*кул менән*), эләктереп сығыу; **втача́ть рукава́** еңде эләктереп сығыу

**ВТА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **втача́ть**

**ВТАЩИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, во что* һөйрәп индереү, һөйрәү; **втащи́ть пиани́но в ко́мнату** бүлмәгә пианиноны һөйрәп индереү **2.** һөйрәп мендереү; **втащи́ть на ле́стницу** баҫҡысҡа һөйрәп мендереү

**ВТАЩИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* көс-хәл менән килеп (барып) инеү, көскә күтәрелеү, көскә менеп етеү, көскә-көскә күтәрелеү

**ВТЕКА́ТЬ** *несов.* **1.** (*вливаться*) ағыу, ағып инеү (төшөү) **2.** (*впадать — о реке, ручье*) ҡойоу, ҡушылыу; **в Бе́лую втека́ет мно́го рек** Ағиҙелгә күп йылғалар ҡоя

**ВТЕМЯ́ШИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* башҡа килеү (инеп ултырыу, инеп оялау), мейегә һеңеү; **втемя́шилась ему́ в го́лову одна́ мысль** уның башына бер фекер инеп ояланы

**ВТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* ышҡыу, ыуыу, ышҡып (ыуып) һеңдереү, һөртөү ♦ **втере́ть очки́** *кому* күҙ буяу (*алдау*)

**ВТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һеңеү (*ышҡыуҙан, ыуыуҙан*); **мазь хорошо́ втёрлась** май яҡшы һеңде **2.** *разг.* ҡыҫылып инеү; **втере́ться в толпу́** халыҡ араһына ҡыҫылып инеү **3.** *перен.* хәйләләп инеү (үтеп инеү) (*берәй ойошмаға һ.б.*); **втере́ться в компа́нию** компанияға хәйләләп үтеп инеү ♦ **втере́ться в дове́рие** хәйләләп, кемдең дә булһа ышанысын ҡаҙаныу (яулау), ышанысҡа инеү

**ВТЕЧЬ** *сов. см.* **втека́ть**

**ВТИРА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **втира́ть**; **втира́ние ма́зи в ко́жу** тәнгә майҙы һөртөү **2.** (*лекарственное вещество*) тәнде ыуа (тәнгә һөртә) торған дарыу (май)

**ВТИРА́ТЬ** *несов. см.* **втере́ть**

**ВТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **втере́ться** **2.** *страд. от* **втира́ть**

**ВТИ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **вти́снуть**

**ВТИ́СНУТЬ** *сов. кого-что, во что* ҡыҫтап (тығыҙлап) һыйҙырыу, тығыҙлап индереү (тығыу); **вти́снуть про́бку в буты́лку** бөкөнө шешәгә ҡыҫтап тығыу

**ВТИ́СНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡыҫылып (ҡыҫылышып) инеү, тығылышып инеү, тығылыу; **вти́снуться в ваго́н** вагонға тығылып инеү

**ВТИХОМО́ЛКУ** *нареч.*; *разг.* өндәшмәй генә, шым ғына, һиҙҙермәйсә, белдермәйсә; **сиде́ть втихомо́лку** өндәшмәй генә ултырыу

**ВТИХУ́Ю** *нареч.*; *прост. см.* **втихомо́лку**

**ВТОЛКНУ́ТЬ** *сов. кого-что, во что* этеп-төртөп (төрткөләп) индереү; **втолкну́ть в дом** өйгә төрткөләп индереү

**ВТОЛКОВА́ТЬ** *сов. что, кому*; *разг.* төшөндөрөп (аңлатып, тылҡып) биреү

**ВТОЛКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **втолкова́ть**

**ВТОПТА́ТЬ** *сов. кого-что, во что* тапап индереү, индергәнсе (һеңдергәнсе) тапау ♦ **втопта́ть в грязь** бысраҡҡа буяу, яла яғыу

**ВТОРГА́ТЬСЯ** *несов. см.* **вто́ргнуться**

**ВТО́РГНУТЬСЯ** *сов.* **1.** бәреп килеп инеү, баҫып килеп инеү; **враг вто́ргся с за́пада** дошман көнбайыштан бәреп килеп инде **2.** (*вмешаться*)

урынһыҙға тығылыу, ҡыҫылыу; **вто́ргнуться в чужи́е дела́** сит кешенең эшенә урынһыҙ тығылыу

**ВТОРЖЕ́НИЕ** *с см.* **вто́ргнуться — вторга́ться**; **вторже́ние неприя́теля** дошмандың баҫып инеүе

**ВТО́РИТЬ** *несов.* **1.** *муз.* икенсе партияны башҡарыу (*йырлағанда йәки музыка ҡоралында уйнағанда*) **2.** *кому-чему* ҡабатлау; **он вто́рил её сме́ху** ул уның көлөүен ҡабатланы **3.** *кому*; *перен.* ҡабатлау, килешеү, йөпләү; **вто́рить му́жу** ирҙең һүҙен йөпләү

**ВТОРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** икенсе, икенсе мәртәбә ...ы, икенсе тапҡыр ...ы, икенсе ҡат ...ы, икенселәй; **втори́чный вы́зов** икенсе тапҡыр саҡырыу **2.** (*не являющийся исходным*) икенсел, икенсе; **втори́чное явле́ние** икенсел күренеш; **втори́чный пери́од боле́зни** ауырыуҙың икенсе осоро **3.** (*побочный*) икенсе дәрәжәләге, өҫтәмә; **втори́чные половы́е при́знаки** *физиол.* өҫтәмә енес билдәләре

**ВТО́РНИК** *м* шишәмбе

**ВТОРО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "икенсе", "икенсел" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **второкла́ссный** икенсе класлы

**ВТОРОГО́ДНИК** *м* и **ВТОРОГО́ДНИЦА** *ж* синыфтан синыфҡа күсмәй ҡалыусы уҡыусы

**ВТОРО́Й,** -ая, -ое **1.** *числ.* икенсе; **второ́й год** икенсе йыл; **втора́я зада́ча** икенсе мәсьәлә **2.** (*второстепенный*) икенсе, икенсе дәрәжәләге; **игра́ть вторы́е ро́ли** икенсе дәрәжәләге ролдәрҙе башҡарыу; **на второ́м пла́не** икенсе планда **3.** (*заменяющий первого*) икенсе; **втора́я мать** икенсе әсә **4.** *в знач. сущ.* **второ́е** *с* (*блюдо*) икенсе, икенсе блюдо; **пригото́вить на второ́е котле́ты** икенсе блюдоға котлет әҙерләү ♦ **втора́я мо́лодость** икенсе йәшлек; **до вторы́х петухо́в** бик оҙаҡ, төндөң икенсе яртыһына тиклем, икенсе әтәс ҡысҡырғансы; **из вторы́х рук** кеше аша (*ишетеү, белеү*)

**ВТОРОКЛА́ССНИК** *м* и **ВТОРОКЛА́ССНИЦА** *ж* икенсе синыф уҡыусыһы, икенсе синыфта уҡыусы

**ВТОРОКУ́РСНИК** *м* и **ВТОРОКУ́РСНИЦА** *ж* икенсе курс студенты, икенсе курста уҡыусы

**ВТОРООЧЕРЕДНО́Й,** -ая, -ое икенсе сираттағы, икенсе сират ...ы; **второочередно́е де́ло** икенсе сираттағы эш

**ВТОРОПЯ́Х** *нареч.* ҡабалана-ҡабалана, ҡабалан, ҡабаланып, ашыҡ-бошоҡ, әлән-борхан; **забы́ть второпя́х** *кого-что-л. нимәнелер, кемделер* ашығып онотоп китеү (ебәреү)

**ВТОРОРАЗРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** икенсе разрядлы, икенсе дәрәжәләге; **второразря́дная мастерска́я** икенсе разрядлы оҫтахана **2.** *разг.* (*посредственный*) уртаса, түбән; **проду́кция второразря́дного ка́чества** уртаса сифатлы продукция

**ВТОРОСО́РТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** икенсе сорт ...ы, икенсе сортлы (сорттағы); **второсо́ртная мука́** икенсе сорт он **2.** *разг.* (*посредственный*) уртаса, урта ҡул, түбән сифатлы; **второсо́ртная рабо́та** урта ҡул эш

**ВТОРОСТЕПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** икенсе дәрәжәләге; **второстепе́нный вопро́с** икенсе дәрәжәләге мәсьәлә **2.** *разг.* (*посредственный*) уртаса, урта ҡул; **второстепе́нный писа́тель** урта ҡул яҙыусы ♦ **второстепе́нные чле́ны предложе́ния** *грам.* һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре

**ВТРАВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *охот.* ауға өйрәтеү, һунарға өйрәтеү (*этте, ҡошто һ.б.*); **втрави́ть соба́ку** этте һунарға өйрәтеү **2.** *во что*; *перен.*, *прост.* насар эшкә өйрәтеү (ылыҡтырыу), насар юлға төшөрөү; **втрави́ть в аза́ртную игру́** ҡомарлы уйынға ылыҡтырыу

**ВТРАВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *охот.* ауға өйрәнеү, һунарға өйрәнеү (*эт, ҡош һ.б.*) **2.** *во что*; *перен.*, *прост.* насар эшкә ылығыу, ҡатнашып китеү; **втрави́ться в но́вое де́ло** яңы эшкә ылығыу

**ВТРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **втрави́ть**

**В-ТРЕ́ТЬИХ** *вводн. сл.* өсөнсөнән

**ВТРИ́ДОРОГА** *нареч.*; *разг.* өсләтә ҡиммәт, бик (ғәҙәттән тыш, сикһеҙ, ныҡ) ҡиммәт; **продава́ть втри́дорога** ныҡ ҡиммәт һатыу

**ВТРО́Е** *нареч.* өс тапҡыр (мәртәбә), өс өлөш, өсләтә, өскә; **втро́е ста́рше** өс мәртәбә олораҡ; **сложи́ть лист втро́е** битте өскә бөкләү

**ВТРОЁМ** *нареч.* өсәү, өсәүләп, өсәүләшеп, өсәү бергә; **отпра́виться на охо́ту втроём** һунарға өсәүләп китеү

**ВТРОЙНЕ́** *нареч.* өс тапҡыр (мәртәбә) артыҡ (күберәк), өсләтә артыҡ (күберәк); **заплати́ть втройне́** өс мәртәбә артыҡ түләү

**ВТУЗ** *м* (*высшее техническое учебное заведение*) втуз (*юғары техник уҡыу йорто*)

**ВТУ́ЛКА** *ж* **1.** *тех.* втулка, сөй; **колёсная вту́лка** тәгәрмәс сөйө **2.** (*затычка*, *пробка*) тығын, бөкө; **вту́лка бо́чки** мискә бөкөһө; **заби́ть пробо́ины вту́лками** тишектәрҙе тығындар менән ҡаплау

**ВТЫКА́ТЬ** *несов. см.* **воткну́ть**

**ВТЫКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **воткну́ться 2.** *страд. от* **втыка́ть**

**ВТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **втяну́ть**

**ВТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **втяну́ться 2.** *страд. от* **втя́гивать**

**ВТЯЖНО́Й,** -ая, -ое **1.** һурыу ...ы, һурҙыртҡыс, тартыу ...ы; **втяжно́й рука́в насо́са** насостың һурҙыртҡыс эсаге **2.** эскә батҡан; **втяжны́е ко́гти хи́щных живо́тных** йыртҡыс хайуандарҙың эскә батҡан тырнаҡтары

**ВТЯ́НУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **втяну́ть 2.** *прил.* эскә батҡан (ингән), эскә тартылған; **втя́нутые щёки** эскә батҡан яңаҡтар

**ВТЯНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һөйрәп (тартып) индереү, һөйрәп (тартып) мендереү, эскә тартыу

(һөйрәү); **втяну́ть за́ руку** ҡулынан һөйрәп индереү; **втяну́ть ло́дку на бе́рег** кәмәне ярға һөйрәп мендереү **2.** (*вобрать в себя*) эскә һурыу, эскә тартыу **3.** *во что*; *перен.*, *разг.* ылыҡтырыу, тартыу, йәлеп итеү; **втяну́ть в рабо́ту** эшкә йәлеп итеү

**ВТЯНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** эскә һурылыу, һурылып инеү, эскә батыу (тартылыу), эскә батып инеү; **у больно́го щёки втяну́лись** ауырыуҙың яңаҡтары эскә батҡан **2.** (*постепенно войти, углубиться*) яйлап инеү, эскә (төпкә) инеп китеү, тартылыу; **коло́нна втяну́лась в лес** колонна урманға тартылды **3.** *во что* (*вовлечься, принять участие в чём-л.*) ҡатнашыу, ҡушылыу, ҡатнашып (ҡушылып) китеү; **втяну́ться в разгово́р** һүҙгә ҡушылыу **4.** (*постепенно привыкнуть, освоиться*) яйлап өйрәнеү, ғәҙәтләнеү, күнегеү, эйәләшеү, өйрәнеп (ғәҙәтләнеп, күнегеп, эйәләшеп) китеү; **бы́стро втяну́ться в но́вую рабо́ту** яңы эшкә бик тиҙ өйрәнеп китеү

**ВУАЛИ́РОВАТЬ** *несов. что* ҡаплау, йәшереү, ҡаплап (йәшереп) ҡалдырыу, әйтмәй ҡалдырыу; **вуали́ровать состоя́ние дел** эштең торошон йәшереү

**ВУА́ЛЬ** *ж* **1.** вуаль, вәл, битлек **2.** (*ткань*) үтә күренмәле йоҡа тауар

**ВУЗ** *м* (*высшее учебное заведение*) вуз (*юғары уҡыу йорто*)

**ВУ́ЗОВЕЦ** *м* и **ВУ́ЗОВКА** *ж*; *разг.* вуз студенты, вузда уҡыусы

**ВУ́ЗОВСКИЙ,** -ая, -ое вуз ...ы; **ву́зовские програ́ммы** вуз программалары

**ВУЛКА́Н** *м* янартау, вулкан; **де́йствующий вулка́н** янартау; **поту́хший вулка́н** һүнгән вулкан ♦ **жить (как) на вулка́не** тынысһыҙ йәшәү, һәр ваҡыт ҡурҡыныс көтөп йәшәү

**ВУЛКАНИЗА́ЦИЯ** *ж*; *тех.* вулканизация (*көкөрт менән ҡыҙҙырып, каучукка һығылмалылыҡ биреү*); **ме́тод горя́чей вулканиза́ции** ҡыҙҙырып вулканизация эшләү ысулы

**ВУЛКАНИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *тех.* вулканизация яһау

**ВУЛКАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое вулкан ...ы, вулкандан; **о́стров вулкани́ческого происхожде́ния** вулкандан барлыҡҡа килгән утрау

**ВУЛЬГАРИЗА́ТОР** *м* вульгарлаштырыусы, тупаҫлаштырыусы

**ВУЛЬГАРИЗА́ЦИЯ** *ж* вульгарлаштырыу, тупаҫ итеп (боҙоп) күрһәтеү

**ВУЛЬГАРИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* вульгарлаштырыу, тупаҫ рәүештә боҙоп күрһәтеү; **вульгаризи́ровать иску́сство** сәнғәтте тупаҫ рәүештә боҙоп күрһәтеү

**ВУЛЬГАРИ́ЗМ** *м*; *лингв.* вульгаризм (*әҙәби телгә ерле һөйләштән йәки жаргондан килеп ингән тупаҫ һүҙ йәки әйтем*)

**ВУЛЬГА́РНОСТЬ** *ж* вульгарлыҡ, тупаҫлыҡ, әҙәпһеҙлек; **вульга́рность ре́чи** телмәрҙең тупаҫлығы

**ВУЛЬГА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*пошлый*) вульгар, тупаҫ, әшәке, әҙәпһеҙ, оятһыҙ; **вульга́рные мане́ры** әҙәпһеҙ ҡыланыштар **2.** (*упрощённый*) вульгар, тупаҫ; **вульга́рный материали́зм** вульгар материализм

**ВУНДЕРКИ́НД** *м* вундеркинд, үтә зирәк (отҡор) бала

**ВУРДАЛА́К** *м*; *фольк.* убыр, албаҫты

**ВХОД** *м* **1.** инеү, кереү; **вход свобо́дный** инеү ирекле **2.** (*место*) инеү урыны (юлы); **вход в тунне́ль** туннелгә инеү юлы

**ВХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **войти́**

**ВХОДНО́Й,** -ая, -ое инеү ...ы, инә торған; **входно́й биле́т** инеү билеты; **входна́я дверь** инә торған ишек

**ВХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **входи́ть** **2.** *прил.* (*полученный учреждением*) ингән, инә торған (*учреждениеға*); **входя́щая бума́га** инә торған ҡағыҙ

**ВХО́ЖИЙ,** -ая, -ее *разг.* килеп-китеп, инеп-сығып йөрөүсе, үҙ кеше, таныш; **быть вхо́жим в артисти́ческий мир** артистар донъяһында үҙ кеше булыу

**ВХОЛОСТУ́Ю** *нареч.* бушҡа, юҡҡа, тиккә, ҡороға, файҙаһыҙға; **рабо́тать вхолосту́ю** бушҡа эшләү

**ВЦЕПИ́ТЬСЯ** *сов. в кого-что*; *разг.* (сат) йәбешеү, матҡып тотоу (эләктереп алыу, тотоноу); **вцепи́ться в во́лосы** сәскә сат йәбешеү

**ВЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **вцепи́ться**

**ВЧЕРА́** *нареч.* кисә(ге); **вчера́ днём** кисә көндөҙ

**ВЧЕРА́ШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* кисәге; **вчера́шний дождь** кисәге ямғыр ♦ **вчера́шний день** үткәндәр, үткән заман; **иска́ть вчера́шний день** юҡҡа ваҡыт әрәм итеү, төшөп ҡалғанды эҙләү

**ВЧЕРНЕ́** *нареч.* ҡаралама хәлендә; **докла́д гото́в вчерне́** доклад ҡаралама хәлендә әҙер

**ВЧЕРТИ́ТЬ** *сов. что* эсенә һыҙыу; **вчерти́ть треуго́льник в круг** түңәрәк эсенә өсмөйөш һыҙыу

**ВЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **вчерти́ть**

**ВЧЕ́ТВЕРО** *нареч.* дүрт тапҡыр (мәртәбә), дүрткә, дүрт өлөшкә; **вче́тверо бо́льше** дүрт тапҡыр ҙурыраҡ; **сложи́ть бума́гу вче́тверо** ҡағыҙҙы дүрткә бөкләү

**ВЧЕТВЕРО́М** *нареч.* дүртәү(ләп), дүртәү бергә, дүртәүләшеп; **рабо́тать вчетверо́м** дүртәүләп эшләү

**В-ЧЕТВЁРТЫХ** *вводн. сл.* дүртенсенән

**ВЧИСТУ́Ю** и **ВЧИ́СТУЮ** *нареч.*; *прост.* бөтөнләй, бөтөнләйгә; **уво́лить вчисту́ю** бөтөнләйгә эштән бушатыу

**ВЧИТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аңлап (төшөнөп) уҡыу, үҙләштереү, үҙләштереп (төшөнөп) алыу; **вчита́ться в текст** тексты аңлап уҡыу; **вчита́ться в дре́вние те́ксты** боронғо текстарға төшөнөп алыу

**ВЧИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **вчита́ться**

**ВШЕ́СТЕРО** *нареч.* алты тапҡыр (мәртәбә), алтыға, алты өлөшкә; **сложи́ть вше́стеро** алтыға бөкләү

**ВШЕСТЕРО́М** *нареч.* алтау, алтаулап, алтау бергә, алтаулашып; **идти́ вшестеро́м** алтаулашып барыу

**В-ШЕСТЫ́Х** *вводн. сл.* алтынсынан

**ВШИВА́ТЬ** *несов. см.* **вшить**

**ВШИ́ВЕТЬ** *несов.* бетләү, беткә батыу

**ВШИВНО́Й,** -ая, -ое ҡушып (ҡуша) тегелгән; **вшивны́е карма́ны** ҡуша тегелгән кеҫәләр

**ВШИ́ВОСТЬ** *ж* бетлелек

**ВШИ́ВЫЙ,** -ая, -ое бетле

**ВШИРЬ** *нареч.* ян-яҡҡа, иңгә, киңлеккә, арҡырыға; **разда́ться вширь** арҡырыға йәйелеү; **вода́ распространя́лась вширь** һыу ян-яҡҡа йәйелде

**ВШИТЬ** *сов. что* (эскә) ҡуша (ҡушып) тегеү, (эс яҡтан) тегеп ҡуйыу, араға (ҡыҫтырып) тегеп ҡуйыу; **вшить рука́в** еңде тегеп ҡуйыу; **вшить карма́ны** кеҫәләрҙе эске яҡтан тегеп ҡуйыу

**ВЪ...** *приставка см.* **в...**

**ВЪЕДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **въе́сться**

**ВЪЕ́ДЛИВОСТЬ** *ж*; *разг.* **1.** (*едкость*) ныҡ һеңеүсәнлек **2.** (*придирчивость*) ваҡсыллыҡ, бәйләнсеклек

**ВЪЕ́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** һеңешле, һеңеүсән, үткер; **въе́дливая кра́ска** һеңеүсән буяу; **въе́дливый за́пах** үткер еҫ **2.** ваҡсыл, бәйләнсек, ялҡытҡыс; **въе́дливый челове́к** ваҡсыл кеше

**ВЪЕЗД** *м* **1.** инеү, кереү; **торже́ственный въезд** тантаналы инеү; **въезд запрещён** инеү тыйыла **2.** (*место*) инеү юлы (урыны), ҡапҡа; **у́зкий въезд** тар ҡапҡа

**ВЪЕЗДНО́Й,** -ая, -ое инеү (кереү) ...ы, инә (керә) торған (*машинала, атта*); **въездны́е воро́та** инә торған ҡапҡа; **въездна́я ви́за** инеү визаһы (*бирәй илгә*)

**ВЪЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **въе́хать**

**ВЪЕ́СТЬСЯ** *сов.* һеңеү, ныҡ һеңешеү; **кра́ска въе́лась в ру́ки** ҡулға буяу һеңгән

**ВЪЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** инеү, барып (килеп) инеү (*машинала йәки атта*); **въе́хать во двор** ишек алдына барып инеү **2.** (*поселиться*) күсеп килеү; **въе́хать в но́вую кварти́ру** яңы фатирға күсеп килеү **3.** менеү, күтәрелеү (*машинала, атта һ.б.*); **въе́хать на го́ру** тауға менеү **4.** *кому, во что*; *груб., прост.* һуғыу, тондороу, менеп төшөү; **въе́хать по мо́рде** томшоҡҡа һуғыу (тондороу)

**ВЫ** *мн.* (вас, вам, вас, вами, о вас) *мест.* һеҙ ♦ **быть на "вы"** *с кем-л.* "һеҙ" тип һөйләшеү

**ВЫ...** *приставка*; *башҡорт телендә түбәндәге мәғәнәләрҙе белдерә*: 1) *эстән тышҡа йүнәлтелгән хәрәкәтте, мәҫ.*, **вы́бежать** йүгереп сығыу; **вы́вести** сығарыу, алып сығыу; 2) *предметтың береһен икенсеһенән йәки предметтың бер өлөшөн икенсеһенән "алыу"ҙы, "алып ташлау"ҙы, "сығарыу"ҙы, мәҫ.*, **вы́бить** бәреп сығарыу, һуғып төшөрөү; **вы́ломать** ватып (һындырып) алыу; 3) *эш-хәрәкәттең тулыһынса тамамланыуын, мәҫ.*, **вы́белить** ағартып бөтөү; **вы́сушить** киптереп бөтөү; 4) *эш-хәрәкәт ярҙамында нимәгәлер ирешеүҙе, өлгәшеүҙе, мәҫ.*, **вы́просить** һорап (үтенеп) алыу; 5) *эш-хәрәкәттең тулыһынса, тейешле кимәлгә еткән булыуын, мәҫ.*, **вы́плакаться** илап эс бушатыу (тынысланыу); **вы́спаться** туйғансы йоҡлау, йоҡлап туйыу

**ВЫБА́ЛТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́болтать**

**ВЫБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **вы́бежать**

**ВЫ́БЕЖАТЬ** *сов.* йүгереп сығыу; **вы́бежать на у́лицу** урамға йүгереп сығыу

**ВЫ́БЕЛИТЬСЯ** *сов.* (*стать белым*) ағарыу, ағартып еткереү; **холсты́ вы́белились** киндер ағарҙы

**ВЫБИВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́бить**

**ВЫБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́биться** **2.** *страд. от* **выбива́ть**

**ВЫБИРА́ТЬ** *несов. см.* **вы́брать**

**ВЫБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́браться** 1, 2, 3; **2.** *страд. от* **выбира́ть**

**ВЫ́БИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бәреп (һуғып) сығарыу, бәреп (һуғып) төшөрөү; **вы́бить стекло́** быяланы бәреп төшөрөү; **вы́бить подно́с из рук** ҡулдан батмусты һуғып төшөрөү; **вы́бить из седла́** эйәрҙән бәреп төшөрөү; **вы́бить заты́чку** тығынды һуғып сығарыу **2.** *кого-что* ҡыуып (бәреп) сығарыу; **вы́бить проти́вника из око́пов** дошманды окоптарҙан бәреп сығарыу **3.** *что*; *разг.* ҡағыу, ҡағып сығарыу; **вы́бить пыль из ковра́** келәмдең саңын ҡағыу **4.** *что* (*уничтожить, вытоптать*) һуғыу (*боҙ һ.б.*), тапап бөтөрөү, тапау; **град вы́бил пшени́цу** бойҙайҙы боҙ һуҡҡан; **рожь вы́бита ското́м** арыш малдан тапалған **5.** *что* (соҡор) яһау; **дождева́я вода́ вы́била я́мы** ямғыр һыуы соҡор(ҙар) яһаған **6.** *что* (*вытиснить, вычеканить*) тапау, сүкеү, баҫыу, һуғыу, һуғып яһау, һалыу, соҡоп яһау (яҙыу); **вы́бить клеймо́** келәймә һалыу (һуғыу, баҫыу); **вы́бить меда́ль** медаль баҫыу; **вы́бить имена́ на мра́морной плите́** мәрмәр плитаға исемдәр соҡоп яҙыу; **вы́бить рису́нок на си́тце** ситсаға һүрәт баҫыу ♦ **вы́бить дурь из головы́** аҡылға ултыртыу; **вы́бить из колеи́** юлдан сығарыу (*урынлашҡан тәртипте боҙоу*)

**ВЫ́БИТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* сығыу; **вы́биться из окруже́ния** ҡамауҙан сығыу **2.** *разг.* ҡотолоу, арыныу; **вы́биться из долго́в** бурыстарҙан ҡотолоу **3.** (*пробиться — о воде, растении и т.п.*) бәреп (тишеп) сығыу, ҡалҡып сығыу; **из пробо́ин вы́билась вода́** тишектәрҙән һыу бәреп сыҡҡан **4.** сығыу, сығып (күренеп) тороу, ялпылдап сығып тороу; **во́лосы вы́бились из-под ша́пки** бүрек аҫтынан сәсе ялпылдап сығып тора ♦ **вы́биться в лю́ди** кеше булыу, ҡорға инеү; **вы́биться из гра́фика (расписа́ния)** графиктан

(расписаниенан) сығыу; **вы́биться из коле́й** юлдан (тәртиптән) сығыу; **вы́биться из си́л** хәлдән тайыу

**ВЫ́БОИНА** *ж* **1.** (*углубление на поверхности*) уйым, уйынты **2.** (*яма, ухаб*) юл соҡорсаҡыры, юл һикәлтәһе, урғылйын

**ВЫ́БОЛТАТЬ** *сов. что*; *разг.* һөйләп биреү (ташлау), әйтеп һалыу (*кәрәкмәгәнде, тейешһеҙҙе һ.б.*)

**ВЫ́БОР** *м* **1.** *см.* **вы́брать** 1; **вы́бор профе́ссии** профессия һайлау **2.** һайлағаны, һайлап алғаны, һайлаған кешеһе; **одо́брить его́ вы́бор** уның һайлағанын (һайлаған кешеһен) хуп күреү **3.** төрлө, һәр (күп) төрлө; **в магази́не большо́й вы́бор това́ров** магазинда тауарҙар күп төрлө **4.** *мн.* **вы́боры** һайлауҙар, һайлау; **вы́боры президе́нта** президент һайлау ♦ **без вы́бора** һайлапнитеп тормайынса; **на вы́бор** теләгәнде; **по своему́ (по моему́) вы́бору** үҙе (үҙем) теләгәнсә, үҙе (үҙем) теләгәнде

**ВЫ́БОРКА** *ж* **1.** *см.* **выбрать** 4, 5; **вы́борка се́ти** ау тартып сығарыу; **вы́борка гру́нта** тупраҡ алыу **2.** *обычно мн.* **вы́борки** күсермә, өҙөмтә, өҙөк, һайланма; **статисти́ческие вы́борки** статистик һайланмалар; **вы́борки из произведе́ний А.С.Пу́шкина** А.С.Пушкин әҫәрҙәренән өҙөктәр

**ВЫ́БОРНОСТЬ** *ж* һайлап ҡуйылыу; **вы́борность руководя́щих о́рганов** етәксе органдарҙың һайлап ҡуйылыуы

**ВЫ́БОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һайлап ҡуйылған (ҡуйыла торған), һайланған; **вы́борное лицо́** һайлап ҡуйылған кеше **2.** һайлау ...ы; **вы́борное собра́ние** һайлау йыйылышы **3.** *в знач. сущ.* **вы́борный** *м* һайлап ҡуйылған кеше

**ВЫ́БОРОЧНЫЙ,** -ая, -ое һайлап, һайланма; **вы́борочная прове́рка** һайлап тикшереү; **вы́борочное обсле́дование** һайланма тикшереү

**ВЫ́БОРЩИК** *м* **1.** (*тот, кто производит выборку*) һайлаусы, һайлап (сүпләп) алыусы **2.** һайлаусы, выборщик (*һайлауҙар күп баҫҡыслы булғанда, һайлаусылар тарафынан ебәрелгән кеше*)

**ВЫ́БРАКОВАТЬ** *сов. кого-что*; *спец.* бракка сығарыу, брак тип һанау

**ВЫБРАКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́браковать**

**ВЫ́БРАНИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* әрләү, әрләп ташлау, һүгеп ташлау, орошоу

**ВЫБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́бросить**

**ВЫБРА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́броситься 2.** *страд. от* **выбра́сывать**

**ВЫ́БРАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һайлау, һайлап алыу; **вы́брать профе́ссию** профессия һайлау **2.** *что*; *разг.* сүпләү, сүпләп (айырып) алыу, таҙартыу; **вы́брать я́годы** еләк таҙартыу; **вы́брать семена́** орлоҡто сүпләп алыу **3.** *кого-что* һайлау, һайлап ҡуйыу; **вы́брать депута́та** депутат һайлау **4.** *что* алыу, алып бөтөрөү; **вы́брать из сундука́ все ве́щи** һандыҡтан бөтә нәмәләрҙе алып бөтөрөү **5.** *что* күтәреү, тартып алыу (сығарыу); **вы́брать сеть** ауҙы тартып сығарыу; **вы́брать я́корь** якорь күтәреү **6.** *что*; *разг.* (буш ваҡыт) табыу; **вы́брать свобо́дную мину́ту** буш ваҡыт табыу

**ВЫ́БРАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** сығыу, йырып (йырынып) сығыу; **вы́браться из до́ма** өйҙән йырынып сығыу; **маши́на не мо́жет вы́браться из гря́зи** машина батҡаҡтан сыға алмай **2.** ҡотолоу, арыныу, сығыу; **вы́браться из нужды́** мохтажлыҡтан сығыу **3.** күсенеү, күсеп сығыу; **они́ вы́брались в сосе́дний дом** улар күрше йортҡа күсенде **4.** *разг.* (*отыскаться — о времени*) (ваҡыт) табылыу; **у него́ вы́бралось свобо́дное вре́мя** уның буш ваҡыты табылды

**ВЫБРИВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́брить**

**ВЫ́БРИТЬ** *сов. что* ҡырыу, ҡырып ташлау, ҡырҙырыу, ҡырҙырып ташлатыу, алыу, алдырыу; **вы́брить го́лову** баш ҡырҙырыу

**ВЫ́БРИТЬСЯ** *сов.* ҡырыныу, ҡырынып алыу

**ВЫ́БРОС** *м* ташлау, ырғытыу, сығарып ташлау (ырғытыу); **вы́брос промы́шленных отхо́дов** сәнәғәт ҡалдыҡтарын сығарып ташлау

**ВЫ́БРОСИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ташлау, сығарып ташлау, алып ташлау, ырғытыу, сығарып ырғытыу (бәреү); **вы́бросить папиро́сы** папирос ырғытыу; **вы́бросить ли́шнюю цита́ту** артыҡ цитатаны алып ташлау **2.** (*поднять на высоту*) юғары (өҫкә) күтәреү; **вы́бросить флаг** флаг күтәреү **3.** *что*; *прост.* сығарыу; **вы́бросить това́р на ры́нок** баҙарға тауар сығарыу **4.** (*выпустить наружу, дать побеги*) сығарыу, ебәреү; **вы́бросить ростки́** үҫентеләр сығарыу; **лук вы́бросил зелёные стре́лки** һуған йәшел ҡыяҡ ебәрҙе ♦ **вы́бросить за́ борт** сығарып ташлау, кире ҡағыу; **вы́бросить из головы́ (из се́рдца, из па́мяти)** баштан (йөрәктән, хәтерҙән) сығарып ташлау; **вы́бросить ло́зунг** лозунг иғлан итеү; **вы́бросить на у́лицу** *кого*: 1) өйҙән ҡыуып сығарыу; 2) эштән ҡыуып сығарыу

**ВЫ́БРОСИТЬСЯ** *сов.* ташланыу, һикереү; **вы́броситься на парашю́тах** парашюттан һикереү; **вы́броситься из окна́** тәҙрәнән ташланыу

**ВЫБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́быть**

**ВЫБЫ́ТИЕ** *с см.* **вы́быть**; **выбы́тие корабля́** караптың китеүе

**ВЫ́БЫТЬ** *сов.* **1.** сығыу, китеү; **вы́быть в столи́цу** баш ҡалаға китеү **2.** (*перестать числиться где-л.*) төшөп ҡалыу, китеү; **вы́быть из шко́лы** мәктәптән китеү; **вы́быть из спи́сков** исемлектән төшөп ҡалыу ♦ **вы́быть из стро́я** сафтан сығыу

**ВЫВА́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **вы́валить**

**ВЫВА́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **вы́валять**

**ВЫВА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вы́валиться 2.** *страд. от* **выва́ливать** I

**ВЫВА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **вы́валяться 2.** *страд. от* **выва́ливать** II

**ВЫ́ВАЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* ауҙарыу, ауҙарып ташлау (төшөрөү, бушатыу), түгеү; **вы́валить у́голь из маши́ны** күмерҙе машинанан ауҙарып бушатыу **2.** *прост.* (*выйти откуда-л. толпой*) ағылып (эркелеп) килеп сығыу, ағылыу, эркелеү

**ВЫ́ВАЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** төшөү, төшөп китеү, килеп төшөү, йығылып (ауып) төшөү; **зуб вы́валился** теш төштө; **птенцы́ вы́валились из гнезда́** ҡош балалары оянан йығылып төшкән **2.** *прост. см.* **вы́валить** 2

**ВЫ́ВАЛЯТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* аунатыу, аунатып (ҡолатып) бысратыу; **вы́валять в снегу́** ҡарҙа аунатыу

**ВЫ́ВАЛЯТЬСЯ** *сов.*; *прост.* аунау, аунап (ҡолап) бысраныу; **вы́валяться в песке́** ҡомда аунау

**ВЫВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **вы́варить**

**ВЫВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́вариться 2.** *страд. от* **выва́ривать**

**ВЫ́ВАРИТЬ** *сов. что* **1.** ҡайнатып табыу (алыу), ҡайнатыу; **вы́варить соль из морско́й воды́** диңгеҙ һыуынан ҡайнатып тоҙ алыу **2.** иҙелгәнсе бешереү; **вы́варить мя́со** итте иҙелгәнсе бешереү

**ВЫ́ВАРИТЬСЯ** *сов.* ҡайнап иҙелеп бөтөү, иҙелеп бешеү

**ВЫ́ВАРКА** *ж см.* **вы́варить** 1; **вы́варка са́хара** ҡайнатып шәкәр алыу

**ВЫ́ВАРКИ** *только мн.*; *спец.* ултырма, ҡалдыҡ (*ҡайнатҡандан һуң*)

**ВЫ́ВЕДАТЬ** *сов. что*; *разг.* һорашып серен алыу (асыҡлау), белеү, төпсөнөп белеү; **вы́ведать та́йну** серҙе төпсөнөп белеү

**ВЫВЕДЕ́НИЕ** *с см.* **вы́вести** 1—7; **выведе́ние фо́рмулы** формула сығарыу; **выведе́ние но́вых поро́д скота́** малдың яңы тоҡомдарын килтереп сығарыу; **выведе́ние пя́тен** тапты бөтөрөү

**ВЫВЕ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́ведать**

**ВЫ́ВЕЗТИ** *сов. кого-что* **1.** сығарыу, алып китеү (сығыу), сығарып ташлау (түгеү); **вы́везти ра́неных с ли́нии фро́нта** фронт һыҙығынан яралыларҙы сығарыу; **вы́везти удобре́ния на поля́** баҫыуға ашлама сығарыу; **вы́везти ме́бель** йорт йыһазын алып сығыу **2.** (*привезти с собой*) алып ҡайтыу (килеү); **вы́везти кни́ги из-за грани́цы** сит илдән китаптар алып ҡайтыу **3.** *перен.*, *прост.* (*выручить*) ҡотҡарыу, ҡотолдороу; **меня́ вы́вез счастли́вый слу́чай** мине бәхетле осраҡ ҡотҡарҙы ♦ **вы́везти на себе́** үҙ елкәңдә күтәреү (*ауырлыҡты, эште һ.б.*)

**ВЫ́ВЕРИТЬ** *сов. что* тикшереү, дөрөҫләү; **вы́верить спи́ски избира́телей** һайлаусылар исемлеген тикшереү; **вы́верить часы́** сәғәт дөрөҫләү

**ВЫ́ВЕРКА** *ж*; *разг. см.* **вы́верить** — **выверя́ть**; **вы́верка весо́в** үлсәүҙе дөрөҫләү

**ВЫ́ВЕРНУТЬ** *сов. что* **1.** бороп алыу (сығарыу); **вы́вернуть винт** винтты бороп сығарыу; **вы́вернуть ла́мпочку** лампочканы бороп алыу **2.** (*выдернуть силой*) йолҡоп алыу (сығарыу, ауҙарыу); **бу́ря вы́вернула де́рево** дауыл ағасты йолҡоп ауҙарған **3.** әйләндереп сығарыу, әйләнеп китеү **4.** *разг.* (*вывихнуть*) ҡаймыҡтырыу, быуынын сығарыу; **вы́вернуть ру́ку** ҡулды ҡаймыҡтырыу **5.** (*перевернуть изнанкой наружу*) әйләндереү (*тиҫкәре яғын, эске яғын*); **вы́вернуть карма́ны** кеҫәләрҙе әйләндереү; **вы́вернуть рука́в** еңде әйләндереү

**ВЫ́ВЕРНУТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* боролоп сығыу; **болт вы́вернулся** болт боролоп сыҡты **2.** *разг.* (*вывихнуться*) ҡаймығыу, быуын сығыу **3.** (*изнанкой наружу*) әйләнеү; **карма́н вы́вернулся** кеҫә (тиҫкәре яғына) әйләнгән **4.** (*выскользнуть из чьих-л. рук*) ысҡыныу, ысҡынып китеү; **ма́льчик вы́вернулся** малай ысҡынып китте **5.** *перен.*, *разг.* (*выйти из затруднительного положения*) ҡотолоу, ҡотолоп сығыу; **вы́вернуться из беды́** бәләнән ҡотолоу **6.** *прост.* (*внезапно появиться*) ҡапыл килеп сығыу; **из-за поворо́та вы́вернулся ко́нный отря́д** боролманан атлы отряд килеп сыҡты

**ВЫ́ВЕРТ** *м*; *разг.* **1.** боролош, бөгөлөш; **пляса́ть с вы́вертами** боролоштар яһап бейеү **2.** (*причуда*) әкәмәт, сәйер ҡыланыш, әкәмәтлек, сәйерлек; **челове́к с вы́вертами** сәйер ҡыланышлы кеше

**ВЫВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́вернуть**

**ВЫВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́вернуться 2.** *страд. от* **вывёртывать**

**ВЫВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́верить**

**ВЫ́ВЕСИТЬ I** *сов. что* элеү, элеп ҡуйыу, сығарып элеү; **вы́весить фла́ги** флагтар элеү; **вы́весить зи́мнюю оде́жду** ҡышҡы кейемдәрҙе сығарып элеү; **вы́весить прика́з** приказ элеү

**ВЫ́ВЕСИТЬ II** *сов. что* (*определить вес*) үлсәү, үлсәп сығыу (тикшереү); **вы́весить та́ру** тараны үлсәп сығыу

**ВЫ́ВЕСКА I** *ж* **1.** вывеска; **вы́веска институ́та** институт вывескаһы **2.** *перен.* (*показная сторона*) күҙ буяу, пәрҙә

**ВЫ́ВЕСКА II** *ж см.* **вы́весить** II

**ВЫ́ВЕСТИ** *сов. кого-что* **1.** (*кого-что*) сығарыу, алып сығыу; **вы́вести дете́й на прогу́лку** балаларҙы тышта йөрөргә алып сығыу **2.** *кого-что* сығарыу; **вы́вести из соста́ва прези́диума** президиум составынан сығарыу **3.** *что* (килтереп) сығарыу, яһау; **вы́вести фо́рмулу** формула сығарыу; **вы́вести заключе́ние** һығымта яһау **4.** *кого* (баҫып) сығарыу; **вы́вести цыпля́т** себеш баҫып сығарыу **5.** *кого-что* үҫтереү, килтереп сығарыу, барлыҡҡа килтереү; **вы́вести но́вый сорт пшени́цы** бойҙайҙың яңы сортын сығарыу **6.** *что* (*построить*) төҙөү, һалыу, күтәреү; **вы́вести кры́шу** ҡыйыҡ күтәреү; **вы́вести ба́ню** мунса һалыу **7.** *кого-что* (*уничтожить*) бөтөрөү, (юҡҡа) сығарыу; **вы́вести пятно́** тапты бөтөрөү; **вы́вести тарака́нов**



7 зак. 2.0084.05

тараҡандарҙы бөтөрөү **8.** *что* (*старательно написать*) тырышып һыҙыу (яҙыу), сығарыу; **вы́вести бу́квы** хәрефтәрҙе тырышып яҙыу **9.** *что* (*старательно спеть*) (тырышып) сығарыу, башҡарыу, йырлау; **вы́вести но́ту** нотаны сығарыу **10.** *кого-что* (*изобразить*) һүрәтләү, тасуирлау, кәүҙәләндереү; **вы́вести в пье́се челове́ка но́вого ти́па** пьесала яңы типтағы кешене кәүҙәләндереү ♦ **вы́вести отме́тку (балл)** уртаса баһа сығарыу; **вы́вести нару́жу** *что* асып һалыу; **вы́вести в лю́ди** *кого* кеше итеү; **вы́вести в расхо́д** юҡ итеү; **вы́вести из терпе́ния** сығырынан сығарыу, түҙемлеген бөтөрөү; **вы́вести из равнове́сия**; **вы́вести из себя́** сығырынан сығарыу; **вы́вести из стро́я** сафтан сығарыу; **вы́вести на доро́гу** дөрөҫ юлға баҫтырыу (сығарыу); **вы́вести на чи́стую во́ду** фаш итеү, асып һалыу

**ВЫ́ВЕСТИСЬ** *сов.* **1.** бөтөү, юғалыу, ҡулланыуҙан сығыу, юҡ булыу, юҡҡа сығыу; **ста́рые обы́чаи вы́велись** иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр юғалды; **моль вы́велась** көйә бөттө **2.** (*появиться — о птенцах*) сығыу; **цыпля́та вы́велись** себештәр сыҡты

**ВЫВЕ́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **вы́ветрить**

**ВЫВЕ́ТРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́ветриться 2.** *страд. от* **выве́тривать**

**ВЫ́ВЕТРИТЬ** *сов. что* **1.** елләтеү, елләтеп алыу, елләтеп сығарыу (бөтөрөү); **вы́ветрить из ко́мнаты за́пах табака́** бүлмәнән тәмәке еҫен елләтеү **2.** ел ашау (елгә ашалыу), емереү, елгә кибеү **3.** *перен.* иҫтән (хәтерҙән) сығарыу, онотторoу; **вы́ветрить из па́мяти** хәтерҙән сығарыу

**ВЫ́ВЕТРИТЬСЯ** *сов.* **1.** елләү, (елләп, таралып) бөтөү, ел менән бөтөү (таралыу); **уга́р вы́ветрился** еҫ бөттө **2.** *геол.* (елгә) ашалыу, емерелеү, елгә кибеү; **го́рная поро́да вы́ветрилась** тау тоҡомдары елгә ашалған **3.** *перен.* (*забыться*) иҫтән (хәтерҙән) сығыу, онотолоу

**ВЫВЕ́ШИВАНИЕ** *с см.* **вы́весить** I

**ВЫВЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **вы́весить** I

**ВЫВЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **вы́весить** II

**ВЫ́ВИНТИТЬ** *сов. что* бороп сығарыу (алыу); **вы́винтить га́йку** гайканы бороп алыу

**ВЫ́ВИНТИТЬСЯ** *сов.* боролоп сығыу; **ла́мпочка вы́винтилась** лампочка боролоп сыҡты

**ВЫВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́винтить**

**ВЫВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́винтиться 2.** *страд. от* **выви́нчивать**

**ВЫ́ВИХ** *м* **1.** быуын сығыу (тайыу), ҡаймығыу; **вы́вих руки́** ҡул быуыны сығыу; **впра́вить вы́вих** быуын ултыртыу **2.** (*место*) быуын сыҡҡан (тайған) урын, ҡаймыҡҡан урын **3.** *перен.*, *разг.* тайпылыш; **вы́вихи в рабо́те** эштәге тайпылыштар; **теорети́ческие вы́вихи** теоретик тайпылыштар

**ВЫ́ВИХНУТЬ** *сов. что* быуын сығарыу (тайҙырыу), ҡаймыҡтырыу; **вы́вихнуть но́гу** аяҡ быуынын сығарыу

**ВЫ́ВИХНУТЬСЯ** *сов.* быуыны сығыу (тайыу), ҡаймығыу; **рука́ вы́вихнулась** ҡул быуыны сыҡҡан

**ВЫ́ВОД** *м* **1.** *см.* **вы́вести** 1—5; **вы́вод войск** ғәскәрҙе сығарыу; **вы́вод математи́ческой фо́рмулы** математик формула сығарыу; **вы́вод птенцо́в** ҡош балаһын сығарыу **2.** һығымта, йомғаҡ, нәтижә; **пра́вильный вы́вод** дөрөҫ һығымта **3.** *тех.* сығарма (*тышҡа сығарылған сым*)

**ВЫВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **вы́вести**

**ВЫВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́вестись 2.** *страд. от* **выводи́ть**

**ВЫВОДНО́Й,** -ая, -ое сығарыу ...ы, сығара торған; **выводно́й аппара́т** сығарыу аппараты

**ВЫ́ВОДОК** *м* бер оя (балалары), бер инә (балалары); **вы́водок ди́ких у́ток** бер оя ҡыр өйрәге бәпкәләре; **во́лчий вы́водок** бер оя бүре балалары, бер инә бүренең балалары

**ВЫ́ВОЗ** *м* **1.** *см.* **вы́везти** 1, 2; **вы́воз дете́й в ла́герь** балаларҙы лагерға алып китеү **2.** (*экспорт*) ситкә сығарыу, экспорт; **вы́воз това́ров** тауарҙы сит илгә сығарыу

**ВЫ́ВОЗИТЬ** *сов. что*; *прост.* бысратыу; **вы́возить брю́ки в гря́зи** салбарҙы батҡаҡҡа бысратыу

**ВЫВОЗИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** *см.* **вы́везти 2.** сығарыу, ситкә сығарыу, экспортҡа ебәреү; **вывози́ть нефть** нефтте ситкә сығарыу

**ВЫ́ВОЗИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* бысраныу, буялыу; **ребёнок вы́возился в песке́** бала ҡомда бысранған

**ВЫ́ВОЗКА** *ж см.* **вы́везти** 1, 2; **вы́возка удобре́ний** ашлама сығарыу

**ВЫВОЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** сығарыу ...ы; **вывозна́я систе́ма** сығарыу системаһы **2.** ситкә сығарыу ...ы, ситкә сығарғанда алына торған; **вывозно́й тари́ф** ситкә сығарыу тарифы

**ВЫВОЛА́КИВАТЬ** *несов. см.* **вы́волочь**

**ВЫ́ВОЛОЧКА** *ж*; *прост.* **1.** *см.* **вы́волочь 2.** (*наказание*) әрләү, орошоу, кәрәген биреү; **зада́ть вы́волочку** кәрәген биреү

**ВЫ́ВОЛОЧЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һөйрәп (өҫтөрәп) сығарыу; **вы́волочь мешо́к муки́** бер тоҡ ондо һөйрәп сығарыу

**ВЫВОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́воротить**

**ВЫВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́воротиться 2.** *страд. от* **вывора́чивать**

**ВЫ́ВОРОТИТЬ** *сов. что*; *прост.* **1.** аҡтарып (ҡуптарып) сығарыу (алыу), аҡтарып (ҡуптарып) ташлау; **смерч вы́воротил дере́вья** ҡойон ағастарҙы аҡтарып ташлаған **2.** *разг.* әйләндереү, тиҫкәре яғын әйләндереү; **вы́воротить тулу́п** толоптоң тиҫкәре яғын әйләндереү **3.** (*перешить, вывернув наизнанку*) тиҫкәре яғын әйләндереп тегеү **4.** *прост.* түңкәреү, ауҙарып ебәреү, әйләндереп ебәреү; **вы́воротить са́ни** сананы түңкәреү

**ВЫ́ВОРОТИТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **вы́вернуться** 3, 4

**ВЫ́ГАДАТЬ** *сов. что* отоу (*алдан уйлап, иҫәпләп*), (аҡсаны) файҙаға ҡалдырыу; **вы́гадать вре́мя** ваҡыт отоу; **вы́гадать сто рубле́й** йөҙ һумды файҙаға ҡалдырыу

**ВЫГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́гадать**

**ВЫ́ГИБ** *м* бөгөл, бөгөлмә, бөгөлөш, бөгөм; **вы́гиб дуги́** дуға бөгөмө

**ВЫГИБА́ТЬ** *несов. см.* **вы́гнуть**

**ВЫГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́гнуться** **2.** *страд. от* **выгиба́ть**

**ВЫ́ГЛАДИТЬ** *сов. что* **1.** (*выровнять*) шымартыу, тигеҙләү **2.** (*выутюжить*) үтекләү

**ВЫГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́гладить**

**ВЫ́ГЛЯДЕТЬ I** *сов. что*; *прост.* күреү, күреп ҡалыу (алыу); **он вы́глядел в толпе́ знако́мое лицо́** ул халыҡ араһында таныш йөҙ күреп ҡалды

**ВЫ́ГЛЯДЕТЬ II** *несов.* күренеү, булып күренеү, төҫ алыу; **торже́ственно вы́глядеть** тантаналы төҫ алыу; **дом вы́глядит совсе́м но́вым** йорт бөтөнләй яңы булып күренә

**ВЫГЛЯ́ДЫВАТЬ I** *несов. см.* **вы́глядеть** I

**ВЫГЛЯ́ДЫВАТЬ II** *несов. см.* **вы́глянуть**

**ВЫ́ГЛЯНУТЬ** *сов.* **1.** һонолоп (ынтылып) ҡарау; **вы́глянуть из окна́** тәҙрәнән һонолоп ҡарау **2.** күренеү, килеп сығыу; **из-за туч вы́глянула луна́** болоттар араһынан ай күренде

**ВЫ́ГНАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуыу, ҡыуып сығарыу (ебәреү); **вы́гнать и́з дому** өйҙән ҡыуып сығарыу; **вы́гнать скот в по́ле** малдарҙы яланға ҡыуыу; **вы́гнать с рабо́ты** эштән ҡыуып сығарыу **2.** *что*; *спец.* ҡыуыу, ҡайнатыу; **вы́гнать спирт** спирт ҡыуыу

**ВЫГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́гнить**

**ВЫ́ГНИТЬ** *сов.* сереү, эстән сереү; **вы́гнила сердцеви́на де́рева** ағас үҙәге серегән

**ВЫ́ГНУТЬ** *сов. что* бөгөү, бөгөп ҡуйыу, бөкрәйтеү, кәмрәйтеү; **вы́гнуть и́вовый пру́тик** тал сыбыҡты бөгөү; **ко́шка вы́гнула спи́ну** бесәй һыртын кәмрәйтте

**ВЫ́ГНУТЬСЯ** *сов.* бөгөлөү, бөкрәйеү, кәмрәйеү

**ВЫГОВА́РИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **вы́говорить** **2.** *кому*; *разг.* иҫкәртеү яһау, әрләү, шелтәләү

**ВЫГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́говориться** **2.** *страд. от* **выгова́ривать** 1

**ВЫ́ГОВОР** *м* **1.** (*произношение*) әйтелеш, һөйләү; **чи́стый вы́говор** дөрөҫ әйтелеш **2.** шелтә; **дать вы́говор** шелтә биреү; **стро́гий вы́говор** ҡаты шелтә; **вы́говор с предупрежде́нием** иҫкәртеүле шелтә

**ВЫ́ГОВОРИТЬ** *сов. что* **1.** (*произнести*) әйтеү, әйтеп биреү, әйтеп ҡуйыу; **вы́говорить слова́ пра́вильно** һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтеү **2.** *разг.* алдан һорап алыу (ҡуйыу), алдан шартын әйтеп ҡуйыу; **вы́говорить дополни́тельные де́ньги** өҫтәлмә аҡса алыу шартын әйтеп ҡуйыу

**ВЫ́ГОВОРИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әйтеп бөтөрөү, бөтәһен дә әйтеү (һөйләү)

**ВЫ́ГОДА** *ж* **1.** (*прибыль*) табыш, төшөм, файҙа; **извле́чь вы́году** табыш алыу **2.** (*польза*) файҙа; **име́ть вы́году** файҙа булыу (алыу)

**ВЫ́ГОДНО 1.** *нареч.* файҙа менән, табыш менән, файҙалы итеп; **прода́ть вы́годно** файҙа менән һатыу **2.** *в знач. сказ.* файҙалы, табышлы; **э́то вы́годно для произво́дства** сәнәғәт өсөн был файҙалы

**ВЫ́ГОДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** файҙалы, төшөмлө, табышлы; **вы́годная сде́лка** файҙалы килешеү; **вы́годная торго́вля** табышлы сауҙа **2.** файҙалы, өҫтөнлөклө, уңайлы, яйлы; **вы́годная до́лжность** өҫтөнлөклө вазифа

**ВЫ́ГОН** *м* **1.** *см.* **вы́гнать**; **вы́гон лошаде́й в по́ле** аттарҙы яланға ҡыуыу **2.** (*пастбище*) көтөүлек, утлауыҡ, тапам; **пасти́ коро́в на вы́гоне** һыйырҙарҙы көтөүлектә көтөү

**ВЫ́ГОНКА** *ж*; *разг.*, *спец. см.* **вы́гнать** 2; **вы́гонка дёгтя** дегет ҡайнатыу

**ВЫГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́гнать**

**ВЫГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́городить**

**ВЫГОРА́ТЬ I** *несов. см.* **вы́гореть** I

**ВЫГОРА́ТЬ II** *несов. см.* **вы́гореть** II

**ВЫ́ГОРЕВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **вы́гореть** I; **вы́горевшие от со́лнца хлеба́** ҡояшта кибеп бөткән иген **2.** *прил.* ҡояшта уңған (янған), ҡояш ашаған; **вы́горевший плащ** ҡояшта уңған плащ

**ВЫ́ГОРЕТЬ I** *сов.* **1.** (*сгореть, высохнуть*) яныу, кибеп (янып, көйөп) бөтөү; **дом вы́горел** өй янып бөткән; **степь вы́горела** дала көйөп бөткән **2.** (*выцвести*) ҡояшта уңыу (яныу), уңып бөтөү, ҡояш ашау; **пла́тье вы́горело** күлдәк уңып бөткән

**ВЫ́ГОРЕТЬ II** *сов.*; *прост.* уңыу (уң булыу), (эш) бешеү, (эш) барып (килеп) сығыу; **де́ло вы́горело** эш беште

**ВЫ́ГОРОДИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*отделить изгородью*) кәртәләү, кәртәләп алыу, ҡамалау; **вы́городить сад** баҡсаны кәртәләп алыу **2.** *кого-что*; *прост.* аралау, яҡлау, ҡурсалау, аралап ҡалыу, яҡлап алып ҡалыу; **вы́городить дру́га** дуҫты яҡлау

**ВЫ́ГРАВИРОВАТЬ** *сов. что* гравёрлау, гравюра яһау, соҡоп яҙыу, семәрләү

**ВЫГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **вы́грести**

**ВЫГРЕБНО́Й,** -ая, -ое сүп-сар түгә торған ♦ **выгребна́я я́ма** сүп-сар түгә торған соҡор

**ВЫ́ГРЕСТИ** *сов.* **1.** *что* һоҫоп алыу (сығарыу), көрәп алыу (сығарыу); **вы́грести жар из пе́чки** мейестәге ҡуҙҙы һоҫоп алыу **2.** (*вёслами*) ишеп (килеп) сығыу, ишеп барып етеү; **вы́грести к бе́регу** ярға ишеп килеп сығыу

**ВЫГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **вы́грузить**

**ВЫГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́грузиться** **2.** *страд. от* **выгружа́ть**

**ВЫ́ГРУЗИТЬ** *сов. кого-что* (йөктө) бушатыу, бушатып бөтөрөү (алыу); **вы́грузить станки́** станоктарҙы бушатыу

**ВЫ́ГРУЗИТЬСЯ** *сов.* **1.** йөк бушатыу, бушатылыу; **су́дно вы́грузилось** судно бушатылды **2.** (*высадиться*) төшөү, төшөп ҡалыу, сығыу; **полк вы́грузился из эшело́на** полк эшелондан төшөп ҡалды

**ВЫ́ГРУЗКА** *ж см.* **вы́грузить**, **вы́грузиться**; **вы́грузка теплохо́да** теплоходтағы йөктө бушатыу; **ме́сто вы́грузки войск** ғәскәрҙең төшөү урыны

**ВЫГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **вы́грызть**

**ВЫ́ГРЫЗТЬ** *сов. что* кимереп тишеү, кимереп ашау, кимереү

**ВЫ́ГУЛ** *м*; *с.-х.* **1.** *см.* **вы́гуляться** **2.** ялан кәртә, тышҡы кәртә

**ВЫ́ГУЛЯТЬСЯ** *сов.*; *с.-х.* һимереү

**ВЫДАВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́дать**

**ВЫДАВА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **вы́даться**

**ВЫДАВА́ТЬСЯ II** *страд. от* **выдава́ть**

**ВЫ́ДАВИТЬ** *сов. что* **1.** һығып (һытып, ҡыҫып) сығарыу; **вы́давить сок из лимо́на** лимондың һутын һығып сығарыу **2.** *перен.* көсләп (һығып) сығарыу; **вы́давить улы́бку** көсләп йылмайыу **3.** баҫып (этеп, төртөп) ватыу; **вы́давить стекло́** быяланы төртөп ватыу **4.** (*вытиснить*) баҫып төшөрөү (сығарыу, яһау), эҙ ҡалдырыу; **вы́давить рису́нок на же́сти** ҡалайға һүрәт баҫып төшөрөү

**ВЫ́ДАВИТЬСЯ** *сов.* **1.** сығыу (*ҡыҫыуҙан*, *һығыуҙан*); **па́ста вы́давилась из тю́бика** тюбиктан паста сыҡты **2.** килеп сығыу (төшөү), ватылыу (*баҫыуҙан*, *ҡыҫыуҙан*); **спи́нка сту́ла вы́давилась** ултырғыстың арты ватылған **3.** (*вытисниться*) сығыу, төшөү (*эҙ*, *рәсем һ.б. тураһында*)

**ВЫДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́давить**

**ВЫДА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́давиться** **2.** *страд. от* **выда́вливать**

**ВЫДА́ИВАТЬ** *несов. см.* **вы́доить**

**ВЫДА́ЛБЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́долбить**

**ВЫ́ДАНЬЕ: на вы́данье** *уст.* еткән, кейәүгә бирерлек (ҡыҙ)

**ВЫ́ДАТЬ** *сов.* **1.** *что* биреү, өләшеү, таратыу; **вы́дать зарпла́ту** эш хаҡы биреү **2.** *кого-что* (*возвратить*) кире биреү (ҡайтарыу); **вы́дать перебе́жчика** ҡасып сығыусыны кире ҡайтарыу **3.** *кого-что* (*обнаружить*, *разоблачить*) асыу, фаш итеү, тотторору, һатыу, белгертеү, белдереү; **вы́дать та́йну** серҙе асыу; **не вы́дать своего́ состоя́ния** үҙеңдең хәлеңде белгертмәү; **вы́дать дру́га** дуҫты һатыу **4.** *за кого-что* (*представить не тем*) итеп (тип) күрһәтеү, тигән булыу; **вы́дать себя́ за знатока́ лошаде́й** үҙен аттар белгесе итеп күрһәтеү **5.** *что* (*добыть*) табыу, сығарыу, эшләп биреү; **вы́дать нефть сверх пла́на** пландан тыш нефть сығарыу ♦ **не вы́дай(те)!** һатма(ғыҙ)!, ҡотҡар(ығыҙ)!; **вы́дать себя́** үҙеңде-үҙең фаш итеү

**ВЫ́ДАТЬСЯ** *сов.* **1.** һонолоп (сығып, һерәйеп, ҡалҡып) тороу; **усту́п скалы́ вы́дался в мо́ре** ҡаяның киртләсе диңгеҙгә сығып тора **2.** (*отличиться*) айырылып (күренеп) тороу, айырылып сығыу; **ма́льчик вы́дался из гру́ппы** малай төркөмдән айырылып торҙо **3.** *разг.* (*оказаться*, *случиться*) тура килеү, булыу; **вы́дался со́лнечный день** ҡояшлы көн тура килде

**ВЫ́ДАЧА** *ж* **1.** *см.* **вы́дать** 1—3, 5; **вы́дача удостовере́ний** танытма биреү; **вы́дача проду́кции** продукция сығарыу; **вы́дача престу́пников** енәйәтселәрҙе тотторору **2.** (*то, что выдано*) бирелгән нәмә (*аҡса*, *тауар һ.б.*); **кру́пная вы́дача** күпләп бирелгән

**ВЫДАЮ́ЩИЙСЯ**, -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **выдава́ться** 1, 2; **2.** *прил.* күренекле, атаҡлы, ҙур; **выдаю́щийся успе́х** ҙур уңыш; **выдаю́щийся актёр** күренекле актёр

**ВЫДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **вы́двинуть**

**ВЫДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́двинуться** **2.** тартып (шыуҙырып, этеп) сығарылыу; **доска́ стола́ выдвига́ется** өҫтәл таҡтаһы тартып сығарыла **3.** *страд. от* **выдвига́ть**

**ВЫДВИЖЕ́НЕЦ** *м* үрләтелгән кеше

**ВЫДВИЖЕ́НИЕ** *с см.* **вы́двинуть**, **вы́двинуться**; **выдвиже́ние кандида́тов в депута́ты** депутатлыҡҡа кандидаттар күрһәтеү

**ВЫДВИЖНО́Й**, -ая, -ое шыуҙырмалы, тартып сығармалы; **выдвижна́я дверь** шыуҙырмалы ишек

**ВЫ́ДВИНУТЬ** *сов.* **1.** *что* этеп (тартып) сығарыу (күсереү), шылдырыу; **вы́двинуть стол на середи́ну ко́мнаты** өҫтәлде бүлмә уртаһына шылдырыу; **вы́двинуть я́щик стола́** өҫтәл тартмаһын тартып сығарыу **2.** *что* (алға) ҡуйыу, (алға) сығарыу; **вы́двинуть плечо́ вперёд** яурынды алға сығарыу **3.** *перен.* (*предложить для обсуждения*) тәҡдим итеү, күрһәтеү, ҡуйыу, ташлау; **вы́двинуть обвине́ние** ғәйеп ташлау; **вы́двинуть те́зис** тезис тәҡдим итеү **4.** күрһәтеү, үрләтеү, күтәреү, ҡуйыу; **вы́двинуть на до́лжность ма́стера** мастер вазифаһына күрһәтеү

**ВЫ́ДВИНУТЬСЯ** *сов.* **1.** алға сығыу, алға күсеү (китеү), алға барып урынлашыу; **пра́вый фланг вы́двинулся** уң фланг алға күсте; **вы́двинуться из толпы́** халыҡ төркөмөнән алға сығыу **2.** үрләү, күтәрелеү; **тала́нтливый арти́ст бы́стро вы́двинулся** һәләтле артист тиҙ күтәрелде

**ВЫ́ДВОРИТЬ** *сов. кого-что* ҡыуыу, һөрөү, ҡыуып (һөрөп) сығарыу; **вы́дворить за преде́лы страны́** илдән ҡыуып сығарыу

**ВЫДВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́дворить**

**ВЫ́ДЕЛ** *м* **1.** уртаҡ мөлкәттең бүленгән өлөшө, бүлендек **2.** уртаҡ мөлкәтте бүлеп биреү

**ВЫ́ДЕЛАТЬ** *сов. что* **1.** оҫта итеп яһау (эшләү); **вы́делать рису́нок на ва́зе** вазала оҫта итеп биҙәк яһау **2.** (*обработать*) эшкәртеү, иләү; **вы́делать ко́жу** тире эшкәртеү

**ВЫДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вы́делить**, **вы́делиться**; **выделе́ние в самостоя́тельное предприя́тие** үҙ аллы предприятиеға бүленеү; **выделе́ние по́та** тир (бүленеп) сығыу **2.** *обычно мн.* **выделе́ния** *физиол.* бүленде

**ВЫДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *физиол.* бүлеп сығарыу …ы, бүлеп сығара торған; **выдели́тельные о́рганы** бүлеп сығарыу органдары

**ВЫ́ДЕЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* бүлеү, айырыу, бүлеп (айырып) алыу, бүлеп (айырып) биреү, бүлеп (айырып) сығарыу, бүлеп (айырып) сығыу; **вы́делить уча́сток для строи́тельства** төҙөлөш өсөн ер бүлеп биреү; **вы́делить гру́ппу вопро́сов** бер төркөм һорауҙы айырып алыу **2.** *кого-что* билдәләү, айырыу, айырып күрһәтеү (биреү); **вы́делить текст курси́вом** тексты курсив менән айырып күрһәтеү **3.** *кого-что*; *ист.* (*имущественно отделить*) башҡа сығарыу, айырып сығарыу; **вы́делить жена́того сы́на** өйләнгән улды башҡа сығарыу **4.** *что* (*вывести наружу, удалить*) бүлеп сығарыу, сығарыу; **вы́делить углеки́слый газ** углекислый газ бүлеп сығарыу

**ВЫ́ДЕЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** айырылыу, бүленеү, айырылып (бүленеп) сығыу; **вы́делиться в самостоя́тельный отде́л** үҙ аллы бүлек булып айырылып сығыу; **вы́делиться из толпы́** төркөмдән айырылыу **2.** (*отличиться*) айырылып тороу; **вы́делиться среди́ рове́сников** йәштәштәр араһында айырылып тороу **3.** *ист.* башҡа сығыу, айырылып сығыу; **вы́делиться от роди́телей** ата-әсәнән башҡа сығыу

**ВЫ́ДЕЛКА** *ж* **1.** *см.* **вы́делать** — **выде́лывать**; **вы́делка ко́жи** тире иләү; **вы́делка кирпича́** кирбес һуғыу **2.** эшләнеш, эшкәртелеш, эшләнеү (эшкәртелеү) сифаты; **чи́стая вы́делка** таҙа эшләнеш ♦ **овчи́нка вы́делки не сто́ит** эшләгән ялы ла юҡ; бер тинлек ҡуян, ун тинлек зыян

**ВЫДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. что* **1.** *см.* **вы́делать 2.** эшләү, яһау, эшкәртеү, иләү, һуғыу, эшләп сығарыу; **выде́лывать пу́говицы** төймәләр эшләп сығарыу **3.** *разг.* (*вытворять*) ҡыландырыу, ҡыланыу

**ВЫДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́делить**

**ВЫДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́делиться 2.** *страд. от* **выделя́ть**

**ВЫ́ДЕРГАТЬ** *сов. что*; *разг.* тартып сығарыу, йолҡоп (һурып) сығарыу (бөтөрөү); **вы́дергать гво́зди** ҡаҙауҙарҙы һурып бөтөү

**ВЫДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **вы́дернуть**, **вы́дергать**

**ВЫДЁРГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́дернуться 2.** *страд. от* **выдёргивать**

**ВЫ́ДЕРЖАННОСТЬ** *ж* **1.** эҙлеклелек, эҙмә-эҙлелек; **иде́йная вы́держанность** идея эҙмә-эҙлелеге **2.** тотанаҡлыҡ, сабырлыҡ; **отлича́ться вы́держанностью** тотанаҡлыҡ менән айырылып тороу

**ВЫ́ДЕРЖАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вы́держать 2.** *прил.* эҙмә-эҙлекле; **вы́держанный стиль** эҙмә-эҙлекле стиль **3.** *прил.* тотанаҡлы, сабыр; **быть вы́держанным** тотанаҡлы булыу **4.** *прил.* оҙаҡ (торған) һаҡланған, тотолған, аҙау; **вы́держанное вино́** оҙаҡ һаҡланған шарап

**ВЫ́ДЕРЖАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* сыҙау, түҙеү, күтәреү; **мост вы́держит нагру́зку** күпер ауырлыҡты күтәрә алыр; **мото́р не вы́держит** мотор түҙә алмаҫ **2.** *кого-что* (*вытерпеть*) сыҙау, түҙеү, сыҙай (түҙә) алыу, күтәрә алыу; **вы́держать тяжёлые испыта́ния** ауыр һынауҙарға түҙеү **3.** *разг.* (*обычно с отрицанием*) тота алыу, тыя алыу, үҙен тотоп ҡалыу; **он не вы́держал и запла́кал** ул үҙен тота алманы һәм илап ебәрҙе **4.** *что* тотоу, бирә алыу; **вы́держать экза́мен** имтихан тотоу **5.** *что* (*соблюсти*) тотоу, үтәү, һаҡлау; **вы́держать за́данные разме́ры** бирелгән үлсәмде тотоу **6.** *что* оҙаҡ һаҡлау (тотоу), оҙаҡ тотоп сифатын яҡшыртыу; **вы́держать сыр** сырҙы ваҡыты еткәнсе тотоу ♦ **вы́держать не́сколько изда́ний** бер нисә баҫмаһы сығыу; **вы́держать па́узу** туҡталыш яһау; **вы́держать роль** аҙаҡҡаса үҙенсә тотоу; **вы́держать хара́ктер** бирешмәү, ныҡ тороу

**ВЫДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́держать** ♦ **не выде́рживает кри́тики** тәнҡиттән түбән, ҡәнәғәтләнерлек түгел, түбән сифатлы

**ВЫ́ДЕРЖКА I** *ж* **1.** тотанаҡлыҡ, сыҙамлыҡ, сабырлыҡ, түҙемлек; **прояви́ть большу́ю вы́держку** ҙур тотанаҡлыҡ күрһәтеү **2.** *см.* **вы́держать** 6; **вы́держка вина́** шарапты оҙаҡ тотоу **3.** *фото.* төшөрөү ваҡыты (*фотоаппарат объективын асыҡ тотоу ваҡыты*); **уме́ньшить вы́держку** төшөрөү ваҡытын кәметеү

**ВЫ́ДЕРЖКА II** *ж* өҙөмтә, өҙөк, цитата; **вы́держки из сочине́ний Ле́рмонтова** Лермонтов әҫәрҙәренән өҙөктәр

**ВЫ́ДЕРНУТЬ** *сов. что* һурып (тартып) алыу, һурып (тартып) сығарыу; **вы́дернуть гвоздь** ҡаҙауҙы һурып алыу; **вы́дернуть кольцо́ парашю́та** парашют дүңгәләген тартып сығарыу

**ВЫ́ДЕРНУТЬСЯ** *сов.* һурылып сығыу, тартылып сығыу; **гвоздь вы́дернулся** ҡаҙау һурылып сыҡты

**ВЫДИРА́ТЬ** *несов. см.* **вы́драть** I

**ВЫ́ДОИТЬ** *сов. кого-что* һауып алыу (бөтөү); **вы́доить коро́ву** һыйырҙы һауып алыу

**ВЫ́ДОЛБИТЬ** *сов. что* **1.** соҡоу, уйыу, соҡоп (уйып) яһау; **вы́долбить отве́рстие** тишек уйыу **2.** *прост.* (*вызубрить*) ҡат-ҡат уҡып ятлау; **вы́долбить стихи́** шиғырҙы ҡат-ҡат уҡып ятлау

**ВЫ́ДОХ** *м* үпкәнән (һауа) сығарыу, тын (һулыш) сығарыу; **обы́чный вы́дох** ғәҙәттәге һулыш сығарыу

**ВЫ́ДОХНУТЬ** *сов. что* (үпкәнән) тын (һулыш) сығарыу

**ВЫ́ДОХНУТЬСЯ** *сов.* **1.** айныу, көсө бөтөү, тәмен (еҫен) юғалтыу; **вино́ вы́дохлось** шараптың көсө бөткән **2.** *перен.*, *разг.* хәлдән тайыу, хәлһеҙләнеү, көсһөҙләнеү, көс бөтөү, һүнеү, һүрелеү, тыныу, тынып ҡалыу; **ата́ка вы́дохлась** һөжүм тынып ҡалды; **как он вы́дохся** ҡайһылай хәлһеҙләнгән ул

**ВЫ́ДРА** *ж* **1.** *зоол.* (*речная*) ҡама; (*морская*) ҡамсат **2.** (*мех*) ҡама, ҡама тиреһе, ҡамсат, ҡамсат тиреһе **3.** *прост.*, *бран.* ябыҡ, йәмһеҙ (*ҡатын-ҡыҙ тураһында*)

**ВЫ́ДРАТЬ I** *сов. что*; *разг.* йыртып (йолҡоп, ҡуптарып) алыу; **вы́драть листы́ из тетра́ди** дәфтәр биттәрен йыртып алыу

**ВЫ́ДРАТЬ II** *сов. кого*; *разг.* туҡмау, һыҙырыу; (*за уши*) ҡолағын бороу

**ВЫ́ДРЕССИРОВАТЬ** *сов. кого-что* өйрәтеп алыу, күнектереү; **вы́дрессировать медве́дя** айыуҙы өйрәтеп алыу

**ВЫ́ДУБИТЬ** *сов. что* дуплау, дуплап эшләү; **вы́дубить ко́жу** тире дуплау

**ВЫ́ДУБИТЬСЯ** *сов.* дупланыу

**ВЫДУВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́дуть**

**ВЫ́ДУВКА** *ж см.* **вы́дуть**; **вы́дувка посу́ды** өрөп һауыт-һаба яһау

**ВЫ́ДУМАТЬ** *сов. что* **1.** уйлап табыу (сығарыу), башҡа килеү; **вы́думать что́-нибудь** берәй нәмә уйлап табыу **2.** *что* (булмаған нәмәне) уйлап табыу (сығарыу), күҙ алдына килтереү ♦ **не вы́думай(те)** *с неопр.* уйлап сығарма, бушты һөйләмә; **по́роха (по́роху) не вы́думает** әллә ҡайҙа китмәгән

**ВЫ́ДУМКА** *ж* **1.** *разг.* уйлап табыу (сығарыу); **он хитёр на вы́думки** ул уйлап сығарыуға оҫта **2.** алдыҡ, уйҙырма, ялған; **всё э́то одна́ вы́думка** былар бөтәһе лә уйҙырма ғына

**ВЫ́ДУМЩИК** *м* и **ВЫ́ДУМЩИЦА** *ж* **1.** *разг.* (*затейник*) уйлап сығарыусы (табыусы), мәҙәксе **2.** *уст.* (*лгун*) алдаҡсы, уйҙырмасы, ялғансы

**ВЫДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́думать**

**ВЫ́ДУТЬ** *сов. что* **1.** өрөү, өрөп сығарыу; **вы́дуть из тру́бки таба́к** төрөпкәнән тәмәкене өрөп сығарыу **2.** *разг.* (ел өрөп) һыуытыу; **дом вы́дуло** өйҙө ел һыуытҡан **3.** (*изготовить дутьём*) өрөп эшләү (яһау); **вы́дуть стекля́нный шар** өрөп быяла шар эшләү **4.** *прост.* (*выпить много чего-л.*) һемереп бөтөрөү, төбөн ялтыратыу ♦ **вы́дуть ого́нь** ут тоҡандырып ебәреү; **вы́дуть печь** *тех.* мейесте яғыуҙан туҡтатыу (*домна мейесен*)

**ВЫДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **вы́дохнуть**

**ВЫДЫХА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́дохнуться** **2.** *страд. от* **выдыха́ть**

**ВЫЕДА́ТЬ** *несов. см.* **вы́есть**

**ВЫ́ЕЗД** *м* **1.** *см.* **вы́ехать** 1; **вы́езд в командиро́вку** командировкаға сығыу **2.** (*место*) сығыу юлы (урыны); **дом стоя́л на вы́езде из дере́вни** өй ауылдан сығыу юлында тора ине **3.** (*лошади с экипажем*) егеүле ат(тар), ат-арба

**ВЫ́ЕЗДИТЬ** *сов. кого* егеп (менеп) йөрөргә өйрәтеү

**ВЫЕЗДНО́Й,** -ая, -ое **1.** сығыу ...ы; **выездны́е воро́та** сығыу ҡапҡаһы **2.** юл ...ы, юл йөрөй торған; **выездны́е ло́шади** юл йөрөй торған аттар **3.** күсмә; **выездна́я се́ссия суда́** судтың күсмә сессияһы; **выездно́й спекта́кль** күсмә спектакль

**ВЫЕЗЖА́ТЬ I** *несов. см.* **вы́ехать**

**ВЫЕЗЖА́ТЬ II** *несов. см.* **вы́ездить**

**ВЫ́ЕМ** *м см.* **вы́емка**

**ВЫ́ЕМКА** *ж* **1.** *см.* **вы́нуть**; **вы́емка гру́нта** тупраҡ алыу **2.** (*вырез*) уйым; **вы́емка для рукава́** eң төбө уйымы **3.** (*углубление*) уйым, соҡор; (*в печи сбоку*) соҡалта; (*на конце стрелы*) киҙлек

**ВЫ́ЕСТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (эсен, уртаһын) ашау; **вы́есть начи́нку пирога́** бәлештең эсен ашау **2.** (*о едких веществах*) ашау, яндырыу, әсеттереү, көйҙөрөү; **глаза́ вы́ело ды́мом** *безл.* төтөн күҙҙе әсеттерҙе; **кислота́ вы́ела кра́ску** кислота буяуҙы ашаған ♦ **вы́еденного яйца́ не сто́ит** һуҡыр бер тин дә тормай

**ВЫ́ЕХАТЬ** *сов.* **1.** сығыу, (сығып) китеү (*атта йәки машинала*); **вы́ехать со двора́** ишек алдынан сығып китеү **2.** килеп сығыу, килеп етеү; **вы́ехать на доро́гу** юлға килеп сығыу **3.** *на ком-чём*; *перен.*, *разг.* (*извлечь выгоду*) үҙе өсөн файҙаланыу, кеше елкәһендә йәшәү, кеше иҫәбендә йәшәү

**ВЫ́ЖАТЬ I** *сов. что* **1.** һығыу, һығып сығарыу; **вы́жать сок из лимо́на** лимондың һутын һығып сығарыу; **вы́жать бельё** кер һығыу **2.** *перен.* (*с трудом извлечь, получить*) (һығып) алыу, алып бөтөрөү, һығыу, файҙаланыу; **вы́жать после́дние си́лы** *из кого-л.* кемдеңдер аҡтыҡ көсөн һығып алыу **3.** (*вытолкнуть, вытеснить*) ҡыҫырыҡлау, ҡыҫырыҡлап сығарыу **4.** *спорт.* күтәреү; **вы́жать сто килогра́ммов** йөҙ килограмм күтәреү

**ВЫ́ЖАТЬ II** *сов. что*; *с.-х.* урыу, урып бөтөрөү; **вы́жать рожь** арышты урып бөтөрөү

**ВЫ́ЖДАТЬ** *сов. что* и *без доп.* көтөү, көтөп тороу (алыу), һағалау; **вы́ждать удо́бный слу́чай** уңайлы осраҡты көтөү

**ВЫ́ЖЕЧЬ** *сов. что* **1.** яндырыу, көйҙөрөү, яндырып (көйҙөрөп) бөтөрөү; **со́лнце вы́жгло траву́** ҡояш үләнде көйҙөрөп бөтөрҙө **2.** (*прожечь*) ашау, яндырыу, ашап (яндырып) тишеү; **хала́т вы́жжен кислото́й** халат кислотанан ашалған **3.** яндырып (көйҙөрөп) яһау, яндырып (көйҙөрөп) биҙәк төшөрөү, яндырып (көйҙөрөп) тамға һалыу; **вы́жечь клеймо́** көйҙөрөп тамға һалыу **4.** *разг.* (*очистить обжиганием*) яндырып (үртәп) таҙартыу; **вы́жечь печны́е тру́бы** мейес торбаһын үртәп таҙартыу **5.** *спец.* (*получить пережиганием*) яндырыу; **вы́жечь древе́сный у́голь** ағас күмере яндырыу

**ВЫЖИВА́ТЬ I** *несов. см.* **вы́жить** I

**ВЫЖИВА́ТЬ II** *несов. см.* **вы́жить** II

**ВЫ́ЖИГА** *м* и *ж*; *прост.* алдаҡсы, хәйләкәр

**ВЫЖИГА́НИЕ** *с см.* **выжига́ть**; **выжига́ние по де́реву** ағасты көйҙөрөп биҙәк төшөрөү; **выжига́ние угля́** күмер яндырыу

**ВЫЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **вы́жечь**

**ВЫЖИДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көтеп тороу …ы; **выжида́тельная поли́тика** көтеп тороу сәйәсәте

**ВЫЖИДА́ТЬ** *несов.* көтеп (һағалап) тороу

**ВЫ́ЖИМ** *м*; *спорт.* күтәреү; **вы́жим шта́нги** штанга күтәреү

**ВЫ́ЖИМКА** *ж* һығыу, һығып алыу (сығарыу); **вы́жимка со́ка** һут һығып алыу

**ВЫ́ЖИМКИ** *только мн.* һығынты, төпрә; **виногра́дные вы́жимки** йөҙөм һығынтыһы; **конопля́ные вы́жимки** тарма төпрәһе

**ВЫЖИНА́ТЬ** *несов. см.* **вы́жать** II

**ВЫ́ЖИТЬ I** *сов.* **1.** иҫән (һау) ҡалыу; **ра́неный вы́жил** яралы иҫән ҡалды **2.** *разг.* (*прожить где-л. известное время*) йәшәп тороу; **вы́жили то́лько одну́ неде́лю** бер аҙна ғына йәшәп торҙолар **3.** *что* (*перенести, пережить*) баштан үткәреү, кисереү; **всё, что я вы́жил в пе́рвые дни ка́торги** һөргөндөң беренсе көнөндә минең кисергән нимәләр ♦ **вы́жить из па́мяти** хәтер бөтөү, онотоусан булып китеү (*картайыуҙан*); **вы́жить из ума́** алйыу, аҡылдан яҙыу (*картлыҡтан*)

**ВЫ́ЖИТЬ II** *сов. кого*; *разг.* ҡыҫырыҡлап (ҡыуып) сығарыу (сығарып ебәреү); **вы́жить с рабо́ты** эштән ҡыҫырыҡлап сығарып ебәреү

**ВЫ́ЗВАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* саҡырыу, саҡырып сығарыу (алыу); **вы́звать това́рища из ко́мнаты** иптәште бүлмәнән саҡырып сығарыу; **вы́звать к телефо́ну** телефонға саҡырыу **2.** *кого-что* саҡырыу; **вы́звать на соревнова́ние** ярышҡа саҡырыу; **вы́звать на разгово́р** һөйләшеүгә саҡырыу **3.** *что* уятыу, ҡуҙғатыу, килтереп сығарыу, тыуҙырыу, барлыҡҡа килтереү; **вы́звать гнев** асыу уятыу; **вы́звать насме́шки** оятлы булыу, көлкөгә ҡалыу ♦ **вы́звать к жи́зни** ғәмәлгә килтереү, ғәмәлләштереү, тормошҡа ашырыу

**ВЫ́ЗВАТЬСЯ** *сов.* үҙ өҫтөнә алыу, риза булыу, теләк белдереү, -рға/-ргә булыу; **вы́зваться помо́чь** ярҙам итергә теләк белдереү

**ВЫ́ЗВОЛИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡотҡарыу, йолоу, йолоп алып ҡалыу, азат итеү; **вы́зволить из беды́** бәләнән ҡотҡарыу

**ВЫЗВОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́зволить**

**ВЫЗДОРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́здороветь**

**ВЫ́ЗДОРОВЕТЬ** *сов.* һауығыу, сәләмәтләнеү, һауығып етеү

**ВЫЗДОРОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **вы́здороветь**; **выздоровле́ние больно́го** ауырыуҙың һауығыуы

**ВЫ́ЗОВ** *м* **1.** *см.* **вы́звать** 1; **вы́зов врача́ на́ дом** врачты өйгә саҡырыу; **вы́зов роди́телей в шко́лу** ата-әсәләрҙе мәктәпкә саҡыртып алыу; **прибы́ть по вы́зову** саҡырыу буйынса килеү (барыу) **2.** (*явочный документ*) саҡырыу ҡағыҙы; **яви́ться с вы́зовом на рука́х** саҡырыу ҡағыҙы менән килеү **3.** *кому-чему* ҡаршы булыу, ҡаршы килеү (сығыу); **бро́сить вы́зов** ҡаршы сығыу **4.** *уст.* (*требование дуэли, поединка*) дуэлгә саҡырыу

**ВЫ́ЗОЛОТИТЬ** *сов. что* алтын ялатыу (йүгертеү)

**ВЫЗРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́зреть**

**ВЫ́ЗРЕТЬ** *сов.* өлгөрөп (бешеп) етеү, өлгөрөү

**ВЫЗУ́БРИВАТЬ** *несов. см.* **вы́зубрить**

**ВЫ́ЗУБРИТЬ** *сов. что*; *разг.* мәғәнәһенә төшөнмәй ятлау

**ВЫЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́звать**

**ВЫЗЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́зваться** **2.** *страд. от* **вызыва́ть**

**ВЫЗЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **вызыва́ть** **2.** *прил.* асыу килтергес (килтерерлек), дорфа; **вызыва́ющий посту́пок** асыу килтерерлек ҡылыныш

**ВЫ́ИГРАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* отоу, отоп алыу; **вы́играть сто ты́сяч** йөҙ мең отоу **2.** *что* и *без доп.* отоу, еңеү, өҫтөнлөк (файҙа) алыу, өҫтөн (еңеп) сығыу; **населе́ние вы́играло бы от сниже́ния цен** хаҡтар төшөүҙән халыҡ файҙа алыр ине; **вы́играть бой** һуғышта еңеп сығыу; **вы́играть суде́бный проце́сс** суд процесында өҫтөнлөк алыу **3.** *в чём* уңышҡа ирешеү (өлгәшеү), ыңғай баһаланыу, ыңғай баһа алыу; **вы́играть в мне́нии** *чьём-л. кемдеңдер* фекерендә ыңғай баһаланыу ♦ **вы́играть вре́мя** ваҡыт отоу, ваҡытта отошҡа ирешеү

**ВЫ́ИГРЫШ** *м* **1.** отош, отоу; **кру́пный вы́игрыш** ҙур отош **2.** (*выгода*) файҙа, өҫтөнлөк; **име́ть вы́игрыш** файҙа алыу **3.** (*победа в чём-л.*) уңышҡа ирешеү (өлгәшеү), еңеп сығыу; **забо́титься о вы́игрыше де́ла** эштең уңышҡа өлгәшеүе хаҡында хәстәрләү ♦ **быть в вы́игрыше**: 1) отоу; 2) файҙа табыу, өҫтөнлөк алыу

**ВЫ́ИГРЫШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** отошло; **вы́игрышный заём** отошло заём **2.** отошло, уңайлы, файҙалы, уңышлы; **вы́игрышный ход** отошло йөрөш; **вы́игрышное положе́ние** уңайлы хәл

**ВЫ́ИСКАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* эҙләп табыу; **вы́искать оши́бку в расчёте** иҫәп-хисапта хатаны эҙләп табыу

**ВЫ́ИСКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* табылыу, билдәле булыу, беленеү; **вы́искалось мно́го жела́ющих отпра́виться в экспеди́цию** *безл.* экспедицияға сығырға теләүселәр бик күп табылды

**ВЫИ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **вы́искать**

**ВЫИ́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́искаться** **2.** *страд. от* **выи́скивать**

**ВЫ́ЙТИ** *сов.* **1.** сығыу, сығып китеү; **вы́йти из ко́мнаты** бүлмәнән сығыу; **вы́йти в сад** баҡсаға сығыу; **войска́ вы́шли из го́рода** ғәскәрҙәр ҡаланан сығып китте **2.** *перен.* ҡатнашыуҙан туҡтау, сығып китеү, (ташлап) сығыу; **вы́йти из игры́** уйындан сығыу; **вы́йти из консервато́рии** консерваторияны ташлап сығып китеү **3.** сығыу, барып (килеп) сығыу; **вы́йти к реке́** йылғаға килеп сығыу; **вы́йти на доро́гу** юлға сығыу **4.** (*произойти из какой-л. среды*) булып (килеп) сы-

ғыу; **он вы́шел из наро́да** ул халыҡ араһынан сыҡҡан **5.** үҫеп сығыу, ҡалҡыу (*үҫемлектәр*) **6.** (*получиться*) (килеп) сығыу; **из него́ вы́йдет хоро́ший учи́тель** унан яҡшы уҡытыусы килеп сығасаҡ; **пло́хо вы́йти на фотогра́фии** фотографияла насар сығыу **7.** *за кого* сығыу; **вы́йти за́муж** кейәүгә сығыу **8.** баҫылып сығыу, нәшер ителеү; **вы́йти из печа́ти** баҫылып сығыу; **вы́шла но́вая кни́га** яңы китап нәшер ителде **9.** (*израсходоваться*) (тотонолоп) бөтөү, сығыу; **все де́ньги вы́шли** аҡса тотош бөттө **10.** (*случиться*) килеп сығыу, булыу; **вы́шла неприя́тность** күңелһеҙ хәл килеп сыҡты ♦ **вы́йти в лю́ди** кеше булыу, аяҡҡа баҫыу; **вы́йти в отста́вку** отставкаға (ялға) сығыу; **вы́йти в тира́ж** ҡулланылыштан сығыу, иҫкереү; **вы́йти из берего́в** ярҙан сығыу, ташыу; **вы́йти из во́зраста** йәше сығыу, ҡартайыу; **вы́йти из головы́ (па́мяти, ума́)** баштан (хәтерҙән, аҡылдан) сығыу; **вы́йти из дове́рия** ышаныстан сығыу; **вы́йти из коле́й** юлдан сығыу; **вы́йти из долго́в** бурыстан ҡотолоу; **вы́йти из положе́ния** ҡыйын хәлдән сығыу, ҡотолоу, яйын табыу; **вы́йти из преде́лов (грани́ц)** сиктән сығыу; **вы́йти из себя́** сығырҙан сығыу; **вы́йти из стро́я** сафтан сығыу (боҙолоу, ауырыу); **вы́йти из-под пера́** *кого* яҙылыу (*кем тарафынандыр*); **вы́йти нару́жу** асылыу, асыҡланыу, беленеү; **не вы́шел** *чем* килеп сыҡмау, тейешле кимәлдә булмау; **го́ды вы́шли** *кому*; *прост.*: 1) йәше етеү, балиғ булыу; 2) йәш үтеү

**ВЫ́КАЗАТЬ** *сов. что*; *разг.* күрһәтеү; **вы́казать хра́брость** батырлыҡ күрһәтеү

**ВЫКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́казать**

**ВЫКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́колоть**

**ВЫКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́копать**

**ВЫ́КАРАБКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** үрмәләп килеп сығыу; **вы́карабкаться из я́мы** соҡорҙан үрмәләп килеп сығыу **2.** *перен.* ҡотолоу, арыныу; **вы́карабкаться из боле́зни** ауырыуҙан арыныу

**ВЫКАРА́БКИВАТЬСЯ** *несов. см.* **вы́карабкаться**

**ВЫКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́кормить**

**ВЫ́КАТАТЬ** *сов.* **1.** *что* тигеҙләү, шымартыу, тәгәрәтеп тигеҙләү; **вы́катать бельё** керҙе тәгәрәтеп тигеҙләү **2.** *кого-что*; *прост.* аунатыу, аунатып алыу (бөтөрөү); **вы́катать в снегу́** ҡарҙа аунатып алыу

**ВЫ́КАТИТЬ** *сов. что* **1.** тәгәрләтеп сығарыу; **вы́катить бо́чки из скла́да** мисkәләрҙе келәттән тәгәрләтеп сығарыу **2.** *разг.* (*быстро выехать*) килеп сығыу (*ҡапыл йүгереп, сабып*); **из-за угла́ вы́катил велосипе́д** мөйөштән велосипед килеп сыҡты **3.** *прост.* (*выпучить*) таҫрайтыу, аҡрайтыу, аҡайтыу; **вы́катить глаза́** күҙҙәрҙе таҫрайтыу

**ВЫ́КАТИТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәрәп (тәгәрәшеп) төшөү, тәгәрәп китеү; **я́блоки вы́катились из корзи́ны** алмалар кәрзиндән тәгәрәшеп төштө **2.** *разг.* (*выехать*) килеп сығыу; **маши́на вы́катилась со двора́** ишек алдынан машина килеп сыҡты **3.** *прост.* (*выпучиться — о глазах*) таҫрайыу, аҡрайыу, аҡайыу, аҡшайыу (*күҙ тураһында*)

**ВЫКА́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **вы́катать**

**ВЫКА́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **вы́катить**

**ВЫКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́катиться** **2.** *страд. от* **выка́тывать** II

**ВЫ́КАЧАТЬ** *сов. что* **1.** һурып (һурҙырып) сығарыу, һурҙырыу; **вы́качать во́здух** һауа һурҙырып сығарыу; **вы́качать во́ду насо́сом** насос менән һыу һурҙырыу **2.** *перен.*, *прост.* (*постепенно отобрать*) һурып алыу, әкренләп алып бөтөрөү; **вы́качать все де́ньги** бөтә аҡсаны әкренләп алып бөтөрөү

**ВЫКА́ЧИВАНИЕ** *с см.* **выка́чивать**; **выка́чивание не́фти** нефть һурҙырыу

**ВЫКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́качать**

**ВЫКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **вы́косить**

**ВЫКА́ШЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́кашлять**

**ВЫ́КАШЛЯТЬ** *сов. что*; *разг.* йүткереп сығарыу (сығарып бөтөрөү)

**ВЫКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́кинуть**

**ВЫ́КИДЫШ** *м* **1.** (*у женщины*) бала төшөү; (*у кобылы*) ҡолон һалыу; (*у коровы*) быҙау һалыу; (*у овец и коз*) бәрәс һалыу **2.** (*плод*) етлекмәй (үле) тыуған бала, етлекмәй (үле) тыуған быҙау (ҡолон, бәрәс)

**ВЫ́РИСОВАТЬ** *сов. что* **1.** бик тырышып (тәпсирләп яһау) төшөрөү (*һүрәттә*) **2.** бик тырышып (ентекләп) яҙыу

**ВЫ́РИСОВАТЬСЯ** *сов.* күренеү, асыҡ булып күренеү, асыҡ төҫмөрләнеү; **на горизо́нте вы́рисовались го́ры** офоҡта асыҡ булып тауҙар күренде

**ВЫРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́рисовать**

**ВЫРИСО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́рисоваться 2.** *страд. от* **вырисо́вывать**

**ВЫ́РОВНЯТЬ** *сов. что* **1.** тигеҙләү, тигеҙләп сығыу (ҡуйыу), таҡырайтыу, таҡырайтып сығыу (ҡуйыу), таҡырлау, шымартыу, шымартып сығыу (ҡуйыу); **вы́ровнять пове́рхность** йөҙөн тигеҙләү; **вы́ровнять доро́гу** юлды тигеҙләү **2.** турайтыу, турайтып ҡуйыу (сығыу), туралау, туралап ҡуйыу (сығыу); **вы́ровнять самолёт** самолётты турайтыу **3.** туралау, туралап ҡуйыу (сығыу), тигеҙләү, тигеҙләп ҡуйыу (сығыу); **вы́ровнять шере́нгу** сафты туралау ♦ **вы́ровнять шаг** аҙымды тигеҙләү

**ВЫ́РОВНЯТЬСЯ** *сов.* **1.** тигеҙләнеү, тигеҙләнеп бөтөү, таҡырайыу, таҡырланыу, таҡырайып (таҡырланып) бөтөү, шымарыу, шымарып бөтөү; **лёд на катке́ вы́ровнялся** катокта боҙ шымарып бөткән **2.** турайыу, тураланыу; **самолёт вы́ровнялся** самолёт турайҙы **3.** тураланыу, тигеҙләнеү; **ро́ты вы́ровнялись** роталар тигеҙләнде **4.** (*развиться физически*) үҫеү, ҙурайыу, үҫеп (ҙурайып) етеү, таҙарыу **5.** төҙәлеү; **хара́ктер у него́ вы́ровнялся** уның холҡо төҙәлде

**ВЫ́РОДИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*ухудшиться в породе*) тоҡомо (нәҫеле, сорты) боҙолоу (насарланыу), аҙыу **2.** *перен.* (*прийти в упадок*) насар яҡҡа үҙгәреү, насарланыу, боҙолоу, әүерелеү, әйләнеү, үҙгәреү

**ВЫ́РОДОК** *м*; *разг.* әҙәм аҡтығы, боҙоҡ кеше

**ВЫРОЖДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **вы́родиться**

**ВЫРОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **вы́родиться**; **при́знаки вырожде́ния** тоҡом боҙолоу билдәләре

**ВЫ́РОНИТЬ** *сов. кого-что* төшөрөү, төшөрөп ебәреү; **вы́ронить ча́шку** сынаяҡты төшөрөп ебәреү

**ВЫ́РОСТ** *м* (*отросток, нарост*) үҫенте, оро

**ВЫ́РОСТОК** *м* **1.** *обл.* өйҙә ҡарап (тәрбиәләп) үҫтерелгән мал **2.** *спец.* бер йәшлек быҙау тиреһе, быҙау күне

**ВЫРУБА́ТЬ** *несов. см.* **вы́рубить**

**ВЫРУБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́рубиться 2.** *страд. от* **выруба́ть**

**ВЫ́РУБИТЬ** *сов. что* **1.** ҡырҡып бөтөрөү (ташлау), киҫеп бөтөрөү (ташлау); **вы́рубить ку-**

**ста́рник** ҡыуаҡлыкты ҡырҡып бөтөрөү **2.** ҡырҡып (киҫеп, уйып) алыу; **вы́рубить кусо́к льда** боҙ киҫәген уйып алыу **3.** һайлап киҫеп алыу (*агасты*); **вы́рубить ёлку** шыршыны һайлап киҫеп алыу **4.** (*высечь*) уйыу, уйып (ҡырҡып, киҫеп, юнып) яһау; **вы́рубить фигу́ры топоро́м** балта менән юнып фигуралар яһау

**ВЫ́РУБИТЬСЯ** *сов.* ағастарҙы (ҡыуаҡтарҙы) ҡырҡып (ҡырҡа-ҡырҡа) килеп сығыу; **вы́рубиться из ча́щи ле́са** урман шырлығынан ағастарҙы ҡырҡа-ҡырҡа килеп сығыу

**ВЫ́РУБКА** *ж* **1.** *см.* **вы́рубить**; **вы́рубка ле́са** урманды ҡырҡып бөтөрөү **2.** *прост.* уйым, киртләс; **сде́лать вы́рубку на бревне́** бүрәнәгә киртләс яһау **3.** ҡырҡынды, киҫенде (*ер*); **ста́рая вы́рубка сно́ва заросла́** иҫке ҡырҡынды тағы ағас менән ҡапланған

**ВЫ́РУГАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һүгеү, тиргәү, әрләү, һүгеп (тиргәп, әрләп) ташлау

**ВЫ́РУГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һүгенеү, тиргәшеү, әрләшеү, һүгенеп ҡуйыу

**ВЫРУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́рулить**

**ВЫ́РУЛИТЬ** *сов.* алып барыу (сығыу), йүнәлтеү (*ерҙә*); **вы́рулить самолёт на ста́ртовую площа́дку** самолётты старт майҙансығына алып сығыу

**ВЫРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **вы́ручить**

**ВЫ́РУЧИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡотҡарыу, ярҙам итеү, аралау, йолоу, йолоп ҡалыу; **вы́ручить из беды́** бәләнән ҡотҡарыу **2.** (*получить деньги, прибыль от чего-л.*) һатып аҡса төшөрөү, хеҙмәттән килем алыу

**ВЫ́РУЧКА** *ж* **1.** *разг. см.* **вы́ручить** 1; **взаи́мная вы́ручка** бер-береңә ярҙам итеү **2.** (*деньги, полученные от продажи и т.п.*) һатыуҙан килгән аҡса, төшөм, керем; **подсчита́ть дневну́ю вы́ручку** көнлөк төшөмдө хисаплау ♦ **на вы́ручку (идти́, прийти́)** ярҙамға килеү, ҡотҡарышыу

**ВЫРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **вы́рвать** I

**ВЫРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **вы́рыть**

**ВЫРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вы́рваться** **2.** (*прилагать усилия освободиться*) ысҡынырға тырышыу, ысҡынырға ынтылыу **3.** *страд. от* **вырыва́ть** I

**ВЫРЫВА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **вы́рыться** **2.** *страд. от* **вырыва́ть** II

**ВЫ́РЫТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡаҙыу, соҡоу, ҡаҙып ташлау; **вы́рыть коло́дец** ҡоҙоҡ ҡаҙыу; **вы́рыть пруд** быуа ҡаҙыу **2.** *что* ҡаҙып (соҡоп) алыу, ҡаҙып (соҡоп) сығарыу; **вы́рыть ка́мень** таш ҡаҙып сығарыу

**ВЫ́РЫТЬСЯ** *сов.* ҡаҙып (өҫкә) сығыу; **крот вы́рылся на пове́рхность** һуҡыр сысҡан ҡаҙып өҫкә килеп сыҡҡан

**ВЫ́РЯДИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* матур итеп (ҡупшы итеп) кейендереү

**ВЫ́РЯДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* матур (ҡупшы) кейенеү

**ВЫРЯЖА́ТЬ** *несов. см.* **вы́рядить**

**ВЫРЯЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́рядиться** **2.** *страд. от* **выряжа́ть**

**ВЫ́САДИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* төшөрөү; **вы́садить деса́нт** десант төшөрөү; **вы́садить пассажи́ров** пассажирҙарҙы төшөрөү **2.** *что* (*растение*) күсереп ултыртыу; **вы́садить помидо́ры в грунт** помидорҙарҙы ергә күсереп ултыртыу **3.** *что*; *прост.* (*выбить*) аҡтарып (ватып) сығарыу; **вы́садить окно́** тәҙрәне аҡтарып сығарыу

**ВЫ́САДИТЬСЯ** *сов.* төшөү, сығыу (*вагондан, автомобилдән һ.б.*); **вы́садиться из ваго́на** вагондан төшөү

**ВЫ́САДКА** *ж* **1.** *см.* **вы́садить** 1, **вы́садиться**; **вы́садка деса́нта** десант төшөрөү **2.** *см.* **вы́садить** 2; **вы́садка цвето́в** сәскәләрҙе күсереп ултыртыу

**ВЫ́САДКИ** *мн.* (*ед.* **вы́садка** *ж* и **вы́садок** *м*); *с.-х.* үҫентеләр (*парниктан ергә күсереп ултыртылған*)

**ВЫСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́садить**

**ВЫСА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́садиться** **2.** *страд. от* **выса́живать**

**ВЫСА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́сосать**

**ВЫ́СВЕРЛИТЬ** *сов. что* быраулап тишеү (тишеп сығарыу); **вы́сверлить отве́рстие** тишек быраулап тишеү

**ВЫ́СВИСТАТЬ** и **ВЫ́СВИСТЕТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*напев, мелодию*) көйләп һыҙғырыу **2.** (*вызвать свистом*) һыҙғырып саҡырыу

**ВЫСВИ́СТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́свистать**

**ВЫ́СВОБОДИТЬ** *сов. кого-что* **1.** азат итеү, ҡотҡарыу, бушатыу; **вы́свободить рабо́чие ру́ки** эшсе ҡулдарҙы бушатыу **2.** бушатыу, ысҡындырыу, сығарыу; **вы́свободить но́гу из стре́мени** өҙәңгенән аяҡты ысҡындырыу

**ВЫ́СВОБОДИТЬСЯ** *сов.* бушау, сығыу, ҡотолоу, ысҡыныу

**ВЫСВОБОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **вы́свободить**

**ВЫСВОБОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́свободиться** **2.** *страд. от* **высвобожда́ть**

**ВЫ́СЕВ** *м*; *с.-х. см.* **вы́сеять**; **но́рма вы́сева** сәсеү нормаһы

**ВЫСЕВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́сеять**

**ВЫСЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́сеяться** **2.** *страд. от* **высева́ть**

**ВЫ́СЕВКИ** *только мн.* көрпә, он эреһе; **мучны́е вы́севки** он эреһе

**ВЫСЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **вы́сеять**

**ВЫСЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́сеяться** **2.** *страд. от* **высе́ивать**

**ВЫСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **вы́сечь** I

**ВЫСЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **вы́селить**, **вы́селиться**; **выселе́ние в но́вые райо́ны** яңы райондарға күсереп ултыртыу

**ВЫ́СЕЛИТЬ** *сов. кого-что* **1.** сығарыу, сығарып ебәреү, ҡыуып сығарыу; **вы́селить из квар-**

**ти́ры** фатирҙан ҡыуып сығарыу **2.** (*переселить*) икенсе ергә күсереү, икенсе ергә күсереп ултыртыу

**ВЫ́СЕЛИТЬСЯ** *сов.* күсеү, күсеп китеү (ултырыу); **вы́селиться из дере́вни** ауылдан күсеп китеү

**ВЫ́СЕЛОК** *м* и **ВЫ́СЕЛКИ** *мн.* яңы ауыл (*ҙур ауылдан айырылып, күсеп ултырған яңы ауыл*)

**ВЫСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́селить**

**ВЫСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́селиться 2.** *страд. от* **выселя́ть**

**ВЫ́СЕМЕНИТЬСЯ** *сов.*; *с.-х.* орлоғо ҡойолоу, өлгөрөп ҡойолоу; **пшени́ца вы́семенилась** бойҙай бөртөктәре ҡойолған

**ВЫ́СЕРЕБРИТЬ** *сов. что* көмөшләү, көмөш ялатыу, көмөш йүгертеп сығыу; **вы́серебрить ло́жки** ҡалаҡтарға көмөш ялатыу

**ВЫ́СЕЧЬ I** *сов. что* соҡоп (уйып) яһау (яҙыу); **вы́сечь на́дпись на грани́те** гранитҡа соҡоп яҙыу ♦ **вы́сечь ого́нь (и́скру)** саҡма сағыу

**ВЫ́СЕЧЬ II** *сов. кого* (*наказать*) туҡмау, ярыу, һыҙырыу, һуҡтырыу

**ВЫ́СЕЯТЬ** *сов. что* сәсеү, сәсеп бөтөрөү

**ВЫ́СЕЯТЬСЯ** *сов.* орлоғо ҡойолоу, орлоғо ергә төшөү

**ВЫ́СИДЕТЬ** *сов.* **1.** *разг.* түҙеп ултырыу, ултыра алыу, ултырып сығыу; **вы́сидеть до конца́ представле́ния** тамашаның аҙағына тиклем түҙеп ултырыу **2.** *кого* баҫыу, баҫып сығарыу; **вы́сидеть цыпля́т** себеш баҫып сығарыу **3.** *что*; *перен.*, *прост.* оҙаҡ ултырып эшләү, ултырып алдырыу

**ВЫСИ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́сидеть**

**ВЫ́СИТЬСЯ** *несов.* ҡалҡып тороу, ҡалҡып күренеп тороу; **вдали́ вы́сится минаре́т** алыҫта манара күренеп тора

**ВЫСКА́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́скоблить**

**ВЫ́СКАЗАТЬ** *сов. что* әйтеү, әйтеп биреү (һалыу); **вы́сказать своё мне́ние** үҙеңдең фекереңде әйтеп биреү

**ВЫ́СКАЗАТЬСЯ** *сов.* әйтеү, һөйләү, фекер әйтеү; **вы́сказаться по докла́ду** доклад буйынса фекер әйтеү

**ВЫСКА́ЗЫВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **вы́сказать, вы́сказаться 2.** (*мнение*) әйткән уй (һүҙ, фекер)

**ВЫСКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́сказать**

**ВЫСКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́сказаться 2.** *страд. от* **выска́зывать**

**ВЫСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **вы́скочить**

**ВЫСКА́ЛЬЗЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́скользнуть**

**ВЫ́СКОБЛИТЬ** *сов. что* **1.** ҡырып шымартыу; **вы́скоблить пол** иҙәнде ҡырып шымартыу **2.** ҡырып таҙартыу, ҡырып юйыу (бөтөрөү), ҡырып ташлау; **вы́скоблить ли́шнюю бу́кву** артыҡ хәрефте ҡырып юйыу **3.** *мед.* ҡырып алыу (ташлау)

**ВЫ́СКОЛЬЗНУТЬ** *сов.* **1.** шыуып төшөү (төшөп китеү), ысҡынып китеү; **зо́нтик вы́скользнул из руки́** ҡулсатыр ҡулдан шыуып төшөп китте **2.** *перен.* шылыу, тайыу, һыпыртыу; **он незаме́тно вы́скользнул** ул һиҙҙермәй генә тайҙы (*ҡасыу*)

**ВЫ́СКОЧИТЬ** *сов.* **1.** (*выпрыгнуть*) һикереп сығыу, ырғып (һикереп) төшөү; **он вы́скочил из окна́** ул тәҙрәнән һикереп сыҡты **2.** килеп сығыу, атылып сығыу; **из-за кусто́в вы́скочил за́яц** ҡуян ҡыуаҡ артынан атылып килеп сыҡты **3.** *перен.*, *разг.* (*неожиданно появиться*) (килеп) сығыу, ҡалҡыу; **вы́скочила борода́вка** сөйәл сыҡҡан **4.** *разг.* көтмәгәндә төшөү, төшөп китеү; **моне́та вы́скочила из карма́на** кеҫәнән аҡса төшөп китте **5.** *прост.* алдан (урынһыҙ) ҡыҫылыу (тығылыу); **вы́скочить со свои́ми замеча́ниями** үҙенең иҫкәрмәләре менән урынһыҙ тығылыу **6.** *разг.* (*с предлогом "в"*) дәрәжәгә ирешә һалыу, һикереү, булып китеү; **вы́скочить в победи́тели** тиҙ генә еңеүсе булып китеү ♦ **вы́скочить из головы́ (из па́мяти)** баштан (хәтерҙән) сығыу; **вы́скочить за́муж** ҡапыл ғына кейәүгә сығыу, кейәүгә сыға һалыу

**ВЫ́СКОЧКА** *м* и *ж*; *разг.* **1.** (*желающий выслужиться*) эпкәләй, үтәбикә **2.** (*случайно занявший какую-л. должность*) юҡтан түрә

**ВЫСКРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **вы́скрести**

**ВЫ́СКРЕСТИ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*скребя, вычистить*) ҡырып таҙартыу, ҡырыу; **он вы́скреб весь двор** ул ишек алдын тотош ҡырып таҙартты **2.** (*скребя, извлечь, удалить что-л.*) ҡырып алыу (алып ташлау), ҡырып сығарыу; **вы́скрести муку́** ондо ҡырып алыу **3.** (*скребя, сделать углубление*) өңөү, өңөп инеү (яһау); **вы́скрести нору́** өңөп, өң яһау

**ВЫ́СЛАТЬ** *сов. кого-что* **1.** ебәреү, һалыу; **вы́слать де́ньги** аҡса һалыу; **вы́слать верховы́х** һыбайлылар ебәреү **2.** сығарыу, сығарып ебәреү; **вы́слать из до́ма** өйҙән сығарып ебәреү **3.** һөрөү, ҡыуыу, һөрөп (ҡыуып) ебәреү; **вы́слать в Сиби́рь** Себергә һөрөү

**ВЫ́СЛЕДИТЬ** *сов. кого-что* аңдып (һағалап, күҙәтеп) табыу, эҙенә төшөү; **вы́следить зве́ря** кейектең эҙенә төшөү

**ВЫСЛЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́следить**

**ВЫ́СЛУГА: за вы́слугой лет** күп йылдар хеҙмәт иткән өсөн

**ВЫСЛУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́служить**

**ВЫСЛУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́служиться 2.** *страд. от* **выслу́живать**

**ВЫ́СЛУЖИТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* билдәле ваҡыт хеҙмәт итеү, оҙаҡ эшләү **2.** хеҙмәт менән яулау, хеҙмәт итеп ирешеү; **вы́служить офице́рский чин** хеҙмәт итеп, офицер дәрәжәһенә ирешеү

**ВЫ́СЛУЖИТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* билдәле бер дәрәжәгә күтәрелеү (*хеҙмәт менән*); **вы́служить-**

**ся в бригади́ры** бригадир дәрәжәһенә күтәрелеү **2.** *перед кем*; *перен.* ҡуштанланып (ялағайланып) ярау, яҡшатланыу; **вы́служиться пе́ред нача́льством** түрәләргә ялағайланып ярау

**ВЫ́СЛУШАТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*прослушать до конца*) тыңлау, аҙағына тиклем тыңлау, тыңлап бөтөрөү; **вы́слушать собесе́дника** әңгәмәләшеүсене тыңлап бөтөрөү **2.** *мед.* тыңлау, тыңлап тикшереү; **вы́слушать лёгкие у больно́го** ауырыуҙың үпкәһен тыңлау

**ВЫСЛУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **вы́слушать**

**ВЫСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **вы́смотреть**

**ВЫСМЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **вы́смеять**

**ВЫ́СМЕЯТЬ** *сов. кого-что* мыҫҡыллау, мыҫҡыл итеп көлөү, мәсхәрәләү, мәсхәрәләп көлөү, көлкөгә ҡалдырыу

**ВЫ́СМОЛИТЬ** *сов. что* ыҫмалалау, ыҫмала һылау; **вы́смолить ло́дку** кәмәне ыҫмалалау

**ВЫ́СМОРКАТЬ** *сов. что* һемгереү, һемгереп ташлау

**ВЫ́СМОРКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һемгереү

**ВЫ́СМОТРЕТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡарап (һайлап) ҡуйыу, эҙләп табыу; **вы́смотреть ме́сто под садо́вый уча́сток** баҡса өсөн урын ҡарап ҡуйыу **2.** *разг.* бөтәһен дә күреү, ҡарап күреү, ҡарап сығыу (бөтөрөү); **всё вы́смотреть** бөтәһен дә ҡарап сығыу ♦ **вы́смотреть (все) глаза́** ҡарап күҙҙәр тоноу

**ВЫСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́сунуть**

**ВЫСО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́сунуться 2.** *страд. от* **высо́вывать**

**ВЫСО́КИЙ,** -ая, -ое **1.** бейек, оҙон, ҡалҡыу; **высо́кий челове́к** оҙон (буйлы) кеше; **высо́кий дом** бейек өй; **высо́кая ме́стность** ҡалҡыу урын **2.** юғары, күтәренке; **высо́кий урожа́й** юғары уңыш; **высо́кие це́ны** юғары хаҡтар; **высо́кое давле́ние** юғары баҫым; **това́ры высо́кого ка́чества** юғары сифатлы тауарҙар **3.** юғары, ҙур, хөрмәтле; **высо́кая награ́да** юғары бүләк; **высо́кое зва́ние** ҙур дәрәжә; **высо́кий гость** ҙур ҡунаҡ **4.** юғары, бөйөк, оло, тәрән; **высо́кое чу́вство** оло хис; **высо́кие стремле́ния** бөйөк ынтылыштар **5.** (*о языке, стиле*) нескә, юғары, тантаналы; **высо́кий стиль** юғары стиль **6.** (*о звуках*) нәҙек, юғары; **высо́кий го́лос** нәҙек тауыш; **высо́кая но́та** юғары нота ♦ **высо́кая грудь** ҡалҡыу күкрәк; **высо́кий лоб** яҫы (киң) маңлай; **высо́кие сапоги́** оҙон ҡуныслы итектәр; **быть высо́кого мне́ния** *о ком-чём* юғары фекерҙә булыу; **пти́ца высо́кого полёта** йәмғиәттә юғары урын биләгән кеше

**ВЫСОКО́** и **ВЫСО́КО 1.** *нареч.* юғары, бейек; **высоко́ держа́ть зна́мя** байраҡты юғары тотоу **2.** *в знач. сказ.* бейек; **до верши́ны горы́ высоко́** тауҙың түбәһенә тиклем бейек

**ВЫСОКО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе өлөшө*: 1) юғары, ҙур; **высокодохо́дный** юғары килемле; **высокоурожа́йный** юғары уңышлы; 2) бейек, оҙон; **высокоство́льный** бейек олонло 3) хөрмәтле; **высокопревосходи́тельство** хөрмәтле ғали йәнәптәре

**ВЫСОКОВО́ЛЬТНЫЙ,** -ая, -ое юғары вольтлы, юғары көсөргәнешле

**ВЫСОКОГО́РНЫЙ,** -ая, -ое бейек тауҙағы, бейек тау ...ы; **высокого́рные па́стбища** бейек тауҙағы көтөүлектәр; **высокого́рное о́зеро** бейек тау күле

**ВЫСОКОИДЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое юғары идеялы; **высокоиде́йное произведе́ние** юғары идеялы әҫәр

**ВЫСОКОКА́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое юғары сифатлы; **высокока́чественная проду́кция** юғары сифатлы продукция

**ВЫСОКОКВАЛИФИЦИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое юғары квалификациялы; **высококвалифици́рованные ка́дры** юғары квалификациялы кадрҙар

**ВЫСОКОМЕ́РИЕ** *с* эрелек, тәкәбберлек, һауалылыҡ; **относи́ться с высокоме́рием** тәкәбберлек күрһәтеү

**ВЫСОКОМЕ́РНОСТЬ** *ж см.* **высокоме́рие**

**ВЫСОКОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое эре, тәкәббер, һауалы; **высокоме́рный челове́к** тәкәббер кеше

**ВЫСОКОНАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое бик (ныҡ) ышаныслы

**ВЫСОКОНРА́ВСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое юғары әхлаҡлы; **высоконра́вственный челове́к** юғары әхлаҡлы кеше

**ВЫСОКООБРАЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое бик белемле, төплө белемле

**ВЫСОКООПЛА́ЧИВАЕМЫЙ,** -ая, -ое юғары (күп) түләүле, күп түләнә торған, күп түләнмәле; **высокоопла́чиваемые до́лжности** юғары түләүле вазифалар

**ВЫСОКОПА́РНЫЙ,** -ая, -ое (*о стиле, словах*) ҡабарынҡы, күтәренке; **высокопа́рное выраже́ние** ҡабарынҡы әйтем; **высокопа́рный стиль** күтәренке стиль

**ВЫСОКОПОСТА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое юғары дәрәжәле, ҙур урындағы, ҙур урында ултырыусы; **высокопоста́вленное лицо́** юғары дәрәжәле кеше

**ВЫСОКОПРОДУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое юғары продуктлы, күп продукция бирә торған; **высокопродукти́вное животново́дство** юғары продуктлы малсылыҡ

**ВЫСОКОПРОИЗВОДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое юғары етештереүсән(ле); **высокопроизводи́тельная рабо́та** юғары етештереүсәнле эш; **высокопроизводи́тельные станки́** юғары етештереүсәнле станоктар

**ВЫСОКОРА́ЗВИТЫЙ,** -ая, -ое юғары үҫеш алған, ныҡ үҫешкән, ныҡ алға киткән; **высокора́звитая промы́шленность** ныҡ үҫешкән сәнәғәт

**ВЫСОКОСО́РТНЫЙ,** -ая, -ое юғары сортлы, юғары сифатлы; **высокосо́ртная проду́кция** юғары сифатлы продукция

**ВЫСОКОТОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое юғары тауарлыҡлы; **высокотова́рное хозя́йство** юғары тауарлыҡлы хужалыҡ

**ВЫСОКОУВАЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое хөрмәтле; **высокоуважа́емый челове́к** хөрмәтле кеше

**ВЫ́СОСАТЬ** *сов. что, из кого-чего* **1.** һурып алыу (сығарыу), һурып алып (имеп) бөтөрөү; **вы́сосать кровь из ра́ны** яранан ҡанды һурып алыу **2.** *перен.* һурыу, һурып ятыу, (алдап) алып бөтөрөү; **вы́сосать после́днюю копе́йку** һуңғы тинде һурып алыу ♦ **вы́сосать все со́ки (кровь)** *из кого-чего* ҡанын һурыу (эсеү), елеген һурыу (киптереү); **вы́сосать из па́льца** *что* уйлап сығарыу, яһап һөйләү

**ВЫСОТА́** *ж* **1.** бейеклек; **высота́ зда́ния** бинаның бейеклеге; **боя́ться высоты́** бейеклектән ҡурҡыу **2.** юғары; **с высоты́ сия́ет луна́** юғарынан ай ҡарай **3.** (*холм, возвышенность*) ҡалҡыулыҡ, түбә, бейеклек; **подня́ться на высоту́** ҡалҡыулыҡҡа менеү **4.** юғарылыҡ; **высота́ давле́ния** баҫым юғарылығы **5.** *мат.* бейеклек ♦ **кома́ндная высота́ (пози́ция)** *см.* **кома́ндный**; **быть (оказа́ться) на высоте́** юғары талаптарға яуап бирерлек дәрәжәлә булыу; **набра́ть высоту́** *см.* **набра́ть**; **с высоты́ пти́чьего полёта** *см.* **полёт**; **с высоты́ своего́ вели́чия** *ирон.* эрелек менән, юғарынан тороп (*мөнәсәбәт белдереү*)

**ВЫСО́ТНИК** *м* **1.** (*строитель*) бейек йорттар һалыусы, бейектә төҙөүсе **2.** (*лётчик*) бейектә осоусы

**ВЫСО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бейеклек ...ы, юғарылыҡ ...ы; **высо́тный по́яс расти́тельности** үҫемлектәрҙең бейеклек бүлкәте **2.** бейек, күп ҡатлы; **высо́тное зда́ние** бейек бина **3.** *ав.* ҙур бейеклектәге, бик юғарылағы; **высо́тный полёт** ҙур бейеклектәге осош; **высо́тные самолёты** ҙур бейеклектә оса торған самолёттар

**ВЫСОТОМЕ́Р** *м*; *тех.* бейеклек үлсәгес

**ВЫ́СОХНУТЬ** *сов.* **1.** кибеү, кибеп бөтөү; **бельё вы́сохло** кер кипте; **лу́жи вы́сохли** күләүектәр кибеп бөттө **2.** быжыу, ҡороу, ҡороп бөтөү, һулыу; **я́блоня вы́сохла** алма ағасы ҡороно; **цветы́ вы́сохли** сәскәләр һулыған **3.** *перен.* ябығыу, ябығып (кибеп) бөтөү, кибеү

**ВЫСОЧА́ЙШИЙ,** -ая, -ее **1.** *превосх. ст. от* **высо́кий** иң бейек (юғары), бик бейек; **высоча́йшая скала́** иң бейек ҡая **2.** ғали йәнәп ...ы, батша хәҙрәттәре ...ы; **высоча́йший ука́з** батша хәҙрәттәре фарманы

**ВЫСО́ЧЕСТВО** *с* ғали йәнәп, батша хәҙрәте

**ВЫ́СПАТЬСЯ** *сов.* йоҡо туйыу, йоҡлап туйыу, туйғансы йоҡлау

**ВЫСПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **вы́спросить**

**ВЫ́СПРОСИТЬ** *сов. что*; *разг.* һорашып белеү, төпсөнөп белеү, төпсөнөп белеп бөтөрөү

**ВЫ́СТАВИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*вынуть*) алыу, алып ҡуйыу; **вы́ставить ра́мы** рамдарҙы алып ҡуйыу **2.** *что* сығарыу, сығарып ҡуйыу; **вы́ставить цветы́ на во́здух** сәскәләрҙе һауаға сығарыу; **вы́ставить шкаф в коридо́р** шкафты коридорға сығарып ҡуйыу **3.** *кого-что*; *перен.*, *прост.* (*выгнать*) сығарып ебәреү, ҡыуып сығарыу **4.** (*выдвинуть вперёд*) алға сығарыу (сығарып ҡуйыу), алға һуҙыу; **вы́ставить грудь** күкрәкте алға сығарыу; **вы́ставить но́гу** аяҡты алға һуҙыу **5.** *что* күрһәтеү, ҡуйыу; **вы́ставить кандидату́ру** кандидатура күрһәтеү; **вы́ставить тре́бования** талаптар ҡуйыу **6.** *что* ҡуйыу; **вы́ставить охра́ну** һаҡсы ҡуйыу **7.** *что* күрһәтергә ҡуйыу; **вы́ставить карти́ну** һүрәттәрҙе күрһәтергә ҡуйыу **8.** *кого-что* тип (итеп), хәлдә күрһәтеү; **вы́ставить в смешно́м ви́де** көлкө итеп күрһәтеү **9.** *что* ҡуйыу, ҡуйып (яҙып) ҡуйыу; **вы́ставить да́ту** дата ҡуйыу; **вы́ставить отме́тки в журна́ле** журналда билдәләр ҡуйып сығыу

**ВЫ́СТАВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* алға сығыу, һонолоу; **вы́ставиться из окна́** тәҙрәнән һонолоу

**ВЫ́СТАВКА** *ж* **1.** *см.* **вы́ставить** 1, 7; **2.** күргәҙмә; **сельскохозя́йственная вы́ставка** ауыл хужалығы күргәҙмәһе; **посети́ть худо́жественную вы́ставку** һынлы сәнғәт күргәҙмәһен ҡарарға барыу

**ВЫСТАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **вы́ставить**; **выставле́ние кандида́тов в депута́ты** депутатлыҡҡа кандидаттар күрһәтеү; **выставле́ние тре́бований** талаптар ҡуйыу

**ВЫСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́ставить**

**ВЫСТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́ставиться** **2.** *страд. от* **выставля́ть**

**ВЫСТАВНО́Й,** -ая, -ое алынмалы, алына торған; **выставны́е ра́мы** алынмалы рамдар

**ВЫ́СТАВОЧНЫЙ,** -ая, -ое күргәҙмә ...ы; **вы́ставочный павильо́н** күргәҙмә павильоны

**ВЫСТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **вы́стоять**

**ВЫСТА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **вы́стояться**

**ВЫ́СТЕГАТЬ I** *сов. что* һырыу, һырып бөтөрөү (ҡуйыу); **вы́стегать одея́ло** юрған һырып ҡуйыу

**ВЫ́СТЕГАТЬ II** *сов. кого*; *прост.* (*высечь*) ҡамсылау, һыҙырыу, сыбыҡлау, ҡайыҙлау

**ВЫСТЁГИВАТЬ** *несов. см.* **вы́стегать** I

**ВЫ́СТЕЛИТЬ** *сов.*; *разг. см.* **вы́стлать**

**ВЫСТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **вы́стлать**

**ВЫ́СТИРАТЬ** *сов. что* йыуыу, йыуып бөтөрөү (ҡуйыу); **вы́стирать бельё** кер йыуып ҡуйыу

**ВЫ́СТЛАТЬ** *сов. что* түшәү, йәйеү, түшәп (йәйеп) сығыу

**ВЫ́СТОЯТЬ** *сов.* **1.** *что* баҫып тороу, баҫып тороп үткәреү; **вы́стоять не́сколько часо́в в о́череди** бер нисә сәғәт сиратта баҫып тороу **2.** бер кимәлдә (шул килеш) тороу, емерелмәйенсә тороу; **дом вы́стоит ёще не оди́н год** өй йәнә бер нисә йыл шул килеш торор **3.** *перен.* (*выдержать*) түҙеү, сыҙау, түҙә (сыҙай) алыу, бирешмәү, ҡаршы тора алыу; **вы́стоять в войне́** һуғышҡа ҡаршы тора алыу

**ВЫ́СТОЯТЬСЯ** *сов.* **1.** оҙаҡ тороп һәйбәтләнеү, оҙаҡ тороп сифаты яҡшырыу; **вино́ вы́стоялось** шарап оҙаҡ тороп һәйбәтләнгән **2.** (*о лошади*) юшау, ял итеү; **ло́шади вы́стоялись по́сле езды́** аттар йөрөгәндән һуң ял итте

**ВЫ́СТРАДАТЬ** *сов. что* **1.** (*пережить*) күп яфа (михнәт) күреү, ғазап сигеү (кисереү) ҡайғы кисереү, күпте күреү (кисереү); **он мно́го вы́страдал** ул күп ғазап кисерҙе **2.** (*достигнуть страданиями*) ғазап (яфа, михнәт) сигеп ирешеү, бик интегеп алыу; **она́ вы́страдала своё сча́стье** ул ғазап сигеп бәхетенә ирешә

**ВЫСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **вы́строить**

**ВЫСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́строиться** **2.** *страд. от* **выстра́ивать**

**ВЫ́СТРЕЛ** *м* атыу (*ҡоралдан*), атыу тауышы, атҡан тауыш; **разда́лся вы́стрел** атыу тауышы ишетелде ♦ **без вы́стрела** ҡаршылыҡһыҙ, атышып тормай; **на вы́стрел** атыу алыҫлығына (*туп, пуля осоп еткән ер*)

**ВЫ́СТРЕЛИТЬ** *сов.* атыу, атып ебәреү; **вы́стрелить в во́здух** һауаға атып ебәреү

**ВЫСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **вы́стричь**

**ВЫ́СТРИЧЬ** *сов. что* (*шерсть*) алыу, ҡырҡыу, ҡырҡып алыу, ҡырыу, ҡырып алыу, ҡайсылау

**ВЫ́СТРОГАТЬ** *сов. что* йышыу, йышып тигеҙләү; **вы́строгать до́ску** таҡта йышыу

**ВЫ́СТРОИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*построить*) һалыу, төҙөү, һалып (төҙөп) ҡуйыу, ҡороу; **вы́строить дом** өй һалыу **2.** *кого-что* (*поставить строем*) теҙеү, теҙеп ҡуйыу, сафҡа теҙеү; **вы́строить ро́ту** ротаны теҙеп ҡуйыу

**ВЫ́СТРОИТЬСЯ** *сов.* **1.** (сафҡа) теҙелеү, сафҡа баҫыу; **батальо́ны вы́строились** батальондар теҙелде **2.** (*возникнуть — о сооружении*) һалыныу, төҙөлөү, ҡоролоу; **вы́строились но́вые зда́ния** яңы йорттар һалынды

**ВЫ́СТУКАТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* туҡылдатып хәбәр биреү (тапшырыу), туҡылдау менән көй сығарыу; **вы́стукать радиогра́мму** радиограмманы туҡылдатып тапшырыу **2.** *кого-что*; *мед.* һуҡҡылап (ҡаҡҡылап) тыңлау (тикшереү); **вы́стукать лёгкие** үпкәне ҡаҡҡылап тыңлап ҡарау

**ВЫСТУ́КИВАТЬ** *несов. см.* **вы́стукать**

**ВЫ́СТУП** *м* **1.** сығынты, сығынҡы; **вы́ступ стены́** стена сығынтыһы **2.** (*скалы́, бе́рега, горы́*) суҡаҡ, суҡы, һикәлтә

**ВЫСТУПА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **вы́ступить** **2.** (алға) сығып тороу, сусайыу; **скала́ выступа́ла над реко́й** ҡая йылға өҫтөнә сығып тора ине **3.** (*ходить важной поступью*) ҡуҡрайып йөрөү, эре ҡиәфәт менән йөрөү

**ВЫ́СТУПИТЬ** *сов.* **1.** алға сығыу (сығып баҫыу); **он вы́ступил не́сколько вперёд** ул бер тиклем алға сығып баҫты **2.** сығыу, (сығып) китеү; **вы́ступить в похо́д** походҡа сығыу **3.** (сик аша) сығыу; **река́ вы́ступила из берего́в** йылға ярҙарынан аша сыҡты **4.** күренеү, килеп (бәреп) сығыу; **пот вы́ступил на его́ лице́** уның битенә тир бәреп сыҡты **5.** сығыш яһау, сығып һөйләү; **вы́ступить на собра́нии** йыйылышта сығыш яһау

**ВЫСТУПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вы́ступить** 2, 5; **выступле́ние арти́стов эстра́ды** эстрада артистарының сығышы; **получи́ть прика́з о выступле́нии** ҡуҙғалыу тураһында приказ алыу **2.** (*речь, доклад*) сығыш; **выступле́ние президе́нта** президенттың сығышы

**ВЫ́СУНУТЬ** *сов. что* сығарыу, һуҙыу; **вы́сунуть го́лову из окна́** тәҙрәнән башты сығарыу ♦ **вы́сунув (вы́суня) язы́к (бежа́ть)** *прост.* телде арҡырыға тешләп (йүгереү); **нельзя́ но́су вы́сунуть (и́з дому)** өйҙән сығырлыҡ түгел

**ВЫ́СУНУТЬСЯ** *сов.* сығыу, һуҙылыу, һонолоу, башты сығарыу; **вы́сунуться из окна́** тәҙрәнән һонолоу

**ВЫСУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **вы́сушить**

**ВЫСУ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́сушиться** **2.** *страд. от* **высу́шивать**

**ВЫ́СУШИТЬ** *сов.* **1.** *что* киптереү, киптереп алыу (ҡуйыу); **вы́сушить бельё** керҙе киптереп алыу **2.** *кого-что* киптереү, киптереп бөтөрөү, ҡоротоу, ҡурыу; **со́лнце вы́сушило степь** ҡояш даланы ҡоротто **3.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* киптереү, ябыҡтырыу, киптереп бөтөү, ябыҡтырып бөтөү; **го́ре вы́сушило его́** ҡайғы уны киптереп бөтөрҙө

**ВЫ́СУШИТЬСЯ** *сов.* кибеү, кибеп бөтөү, кибеп етеү (сығыу), кибенеү

**ВЫ́СЧИТАТЬ** *сов. что* **1.** һанап (иҫәпләп, хисаплап) сығарыу, һанау, иҫәпләү; **вы́считать су́мму расхо́дов** сығымдарҙың суммаһын иҫәпләп сығарыу **2.** *разг.* тотоп (алып) ҡалыу, тотоу (*аҡсаны*); **вы́считать из зарпла́ты ты́сячу рубле́й** эш хаҡынан мең һум тотоп ҡалыу

**ВЫСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́считать**

**ВЫ́СШИЙ,** -ая, -ее **1.** *превосх. ст. от* **высо́кий** 2, 3; **2.** юғары, иң юғары, төп, иң мөһим; **вы́сшие о́рганы госуда́рственной вла́сти** дәүләт власының юғары органдары; **вы́сший кома́ндный соста́в** юғары команда составы; **вы́сшее образова́ние** юғары белем ♦ **в вы́сшей сте́пени** сиктән тыш, иң юғары дәрәжәлә

**ВЫСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **вы́слать**

**ВЫ́СЫЛКА** *ж см.* **вы́слать**

**ВЫ́СЫПАТЬ** *сов.* **1.** *что* бушатыу, түгеү, ҡойоу, сәсеү, бушатып (һалып) ҡуйыу; **вы́сыпать я́годы из корзи́ны** кәрзиндән еләкте бушатыу; **вы́сыпать муку́ в мешо́к** ондо тоҡҡа бушатыу; **вы́сыпать моне́ты** ваҡ аҡсаны сәсеү **2.** *разг.* күмәкләп йүгереп сығыу, һибелеү; **наро́д вы́сыпал на у́лицу** халыҡ урамға йүгереп сыҡты **3.** (*о сыпи*) сығыу, килеп сығыу, сабыртыу, тибеү **4.** күренеү, ҡалҡыу; **звёзды вы́сыпали** йондоҙҙар ҡалҡты

**ВЫСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **вы́сыпать**

**ВЫ́СЫПАТЬСЯ** *сов.* **1.** түгелеү, ҡойолоу, сәселеү, түгелеп (ҡойолоп, сәселеп) китеү (бөтөү); **мука́ вы́сыпалась** он түгелеп китте **2.** *разг. см.* **вы́сыпать** 2

**ВЫСЫПА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вы́сыпаться** **2.** *страд. от* **высыпа́ть**

**ВЫСЫПА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **вы́спаться**

**ВЫСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **вы́сохнуть**

**ВЫСЬ** *ж* **1.** юғарылыҡ, бейеклек **2.** *мн.* **вы́си** (*вершины гор*) баш, түбә

**ВЫТА́ЛКИВАТЬ** *несов. см.* **вы́толкать**, **вы́толкнуть**

**ВЫТА́ПЛИВАТЬ I** *несов. см.* **вы́топить** I

**ВЫТА́ПЛИВАТЬ II** *несов. см.* **вы́топить** II

**ВЫТА́ПЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **вы́топиться** I; **2.** *страд. от* **выта́пливать** I

**ВЫТА́ПЛИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **вы́топиться** II; **2.** *страд. от* **выта́пливать** II

**ВЫТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́топтать**

**ВЫТАРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **вы́таращить**

**ВЫ́ТАРАЩИТЬ** *сов. что*; *разг.* аҡайтыу, таҫрайтыу; **вы́таращить глаза́** күҙ аҡайтыу

**ВЫ́ТАРАЩИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аҡайыу, таҫрайыу

**ВЫТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **вы́тащить**

**ВЫ́ТАЧАТЬ** *сов. что* тегеү, һырып тегеү, йөйләп тегеү; **вы́тачать пе́тли** элмәкте йөйләп тегеү

**ВЫТА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́точить** 1

**ВЫ́ТАЧКА** *ж* йөй; **вы́тачки на пла́тье** күлдәктәге йөйҙәр

**ВЫ́ТАЩИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һөйрәп сығарыу, һөйрәп сығарып ташлау (ҡуйыу); **вы́тащить ло́дку на бе́рег** кәмәне ярға һөйрәп сығарыу **2.** *что* һурып алыу, һурып (тартып) сығарыу; **вы́тащить зуб** теште һурып алыу; **вы́тащить зано́зу** шырауҙы тартып сығарыу **3.** *что* алыу, тартып алыу (сығарыу); **вы́тащить нож из но́жен** ҡындан бысаҡ тартып сығарыу **4.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (тышҡа) алып сығыу, йөрөргә сығарыу, барырға (сығырға) мәжбүр итеү (күндереү); **вы́тащить друзе́й на приро́ду** дуҫтарҙы тәбиғәткә сығырға күндереү

**ВЫТВОРЯ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* ҡыланыу, эшләү, яһау; **вытворя́ть чудеса́** төрлө мәҙәктәр эшләү

**ВЫТЕКА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **вы́течь** **2.** (*брать начало*) ағып сығыу, башланыу; **река́ вытека́ет из о́зера** йылға күлдән ағып сыға **3.** *перен.* (килеп) сығыу; **из э́того вытека́ет сле́дующий вы́вод** бынан түбәндәге һығымта килеп сыға

**ВЫ́ТЕРЕБИТЬ** *сов. что*; *с.-х.* йолҡоу, йолҡоп алыу (бөтөрөү); **вы́теребить лён** етен йолҡоп алыу

**ВЫ́ТЕРЕТЬ** *сов. что* **1.** һөртөп алыу (ҡоротоу), ышҡыу, ышҡып таҙартыу; **вы́тереть ру́ки** ҡулды һөртөү; **вы́тереть слёзы** күҙ йәшен һөртөп алыу; **вы́тереть стол** өҫтәлде һөртөп алыу **2.** *разг.* (*стать потёртым*) ышҡып туҙҙырыу, ҡырылып бөтөү

**ВЫ́ТЕРЕТЬСЯ** *сов.* **1.** һөртөнөү; **вы́тереться полоте́нцем** таҫтамал менән һөртөнөү **2.** *разг.* ышҡылып туҙыу, ҡырылып бөтөү; **оби́вка на кре́слах вы́терлась** креслоларҙың тышлығы ҡырылып бөткән

**ВЫ́ТЕРПЕТЬ** *сов.* **1.** *что* сыҙау, түҙеү, киселеү; **вы́терпеть боль** ауыртыуға сыҙау **2.** *без доп.* (*обычно с отрицанием*); *разг.* сыҙамлылыҡ (түҙемлелек) күрһәтеү, сыҙау, түҙеү, сыҙап (түҙеп) тороу, сыҙай (түҙә) алыу; **не вы́терпеть и возрази́ть** түҙеп тормай ҡаршы әйтеү

**ВЫ́ТЕСАТЬ** *сов. что* юнып эшләү (яһау); **вы́тесать лопа́ту** юнып көрәк эшләү

**ВЫ́ТЕСНИТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡыҫырыҡлау, ҡыҫырыҡлап (этеләп) сығарыу; **вы́теснить из толпы́** халыҡ төркөмөнән ҡыҫырыҡлап сығарыу **2.** алмаштырыу; **но́вая те́хника вы́теснила ста́рую** яңы техника иҫкеһен алмаштырҙы

**ВЫТЕСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́теснить**

**ВЫТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́тесать**

**ВЫ́ТЕЧЬ** *сов.* ағып сығыу (бөтөү); **вода́ вы́текла из ба́ка** һыу бактан ағып бөткән

**ВЫТИРА́ТЬ** *несов. см.* **вы́тереть**

**ВЫТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́тереться** **2.** *страд. от* **вытира́ть**

**ВЫ́ТИСНИТЬ** *сов. что* батыра баҫып яҙыу (төшөрөү), баҫып эҙ ҡалдырыу; **вы́тиснить имена́** исемдәрҙе баҫып яҙыу

**ВЫТИСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́тиснить**

**ВЫ́ТКАТЬ** *несов. что* **1.** һуғыу, туҡыу; **вы́ткать полоте́нце из льна** етендән таҫтамал һуғыу **2.** (*сделать рисунок посредством тканья*) сүпләп һуғыу, суптарлау

**ВЫ́ТОЛКАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* этеп сығарып ебәреү, этеп сығарыу, төртөп сығарып ебәреү, төртөп сығарыу

**ВЫ́ТОЛКНУТЬ** *сов. кого-что* этеп сығарыу, төртөп сығарыу

**ВЫ́ТОПИТЬ I** *сов. что* яғыу, яғып йылытыу; **вы́топить печь** мейес яғыу

**ВЫ́ТОПИТЬ II** *сов. что* һыҙҙырыу, иретеү, иретеп алыу; **вы́топить са́ло** туң май иретеү

**ВЫ́ТОПИТЬСЯ I** *сов.* яғылыу, яғылып бөтөү; **печь вы́топилась** мейес яғылып бөттө

**ВЫ́ТОПИТЬСЯ II** *сов.* һыҙҙырылыу, ирeү (*туң май*)

**ВЫ́ТОПКИ** *только мн.* төпрә, һыҙыҡ (*иретелгән майҙан ҡалған*)

**ВЫ́ТОПТАТЬ** *сов. что* **1.** тапау, иҙеү, тапап (иҙеп) бөтөрөү; **вы́топтать посе́вы** сәсеүлектәрҙе тапап бөтөрөү **2.** тапап һуҡмаҡ һалыу, һуҡмаҡлау; **вы́топтать в снегу́ тропи́нку** ҡар өҫтөнән һуҡмаҡ һалыу **3.** *прост.* (тапап) бысратыу; **вы́топтать пол** иҙәнде тапап бысратыу

**ВЫ́ТОРГОВАТЬ** *сов. что*; *разг.* һатыулашып хаҡын кәметтереү; **вы́торговать сто рубле́й** һатыулашып йөҙ һумға хаҡын кәметтереү

**ВЫТОРГО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́торговать**

**ВЫ́ТОЧИТЬ** *сов. что* **1.** ҡырып эшләү (яһау); **вы́точить дета́ль** деталь ҡырып яһау **2.** *прост.* үткерләү; **вы́точить но́жницы** ҡайсы үткерләү

**ВЫ́ТРАВИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*вывести химическим воздействием*) бөтөрөү, юйыу, юйҙырып бөтөрөү; **вы́травить пя́тна** таптарҙы бөтөрөү **2.** *кого-что* ағыулау, ағыулап үлтереү; **вы́травить крыс** ҡомаҡтарҙы ағыулап үлтереү **3.** *что* һүрәт яһау (төшөрөү), яҙыу; **вы́травить рису́нок на ме́ди** баҡырға һүрәт төшөрөү **4.** *что* тапатыу, тапатып бөтөрөү; **вы́травить луг** болондо тапатып бөтөрөү **5.** *кого-что* өркөтөп (ҡурҡытып) ҡыуып сығарыу; **вы́травить зве́ря из ле́са** кейекте урмандан өркөтөп ҡыуып сығарыу

**ВЫ́ТРАВИТЬСЯ** *сов.* **1.** бөтөү, ашалып бөтөү (*химик ысул менән эшкәртеүҙән*); **кра́ска вы́травилась** буяуы ашалып бөткән **2.** ашалып төшөрөү (яһалыу) (*һүрәт, биҙәк һ.б.*); **узо́р вы́травился** биҙәк ашалып яһалған

**ВЫТРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **вы́травить**

**ВЫТРА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́травиться** **2.** *страд. от* **вытра́вливать**

**ВЫТРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́травить**

**ВЫ́ТРЕБОВАТЬ** *сов.* **1.** *что* һоратып алдырыу, һорап алыу, талап итеп алыу; **вы́требовать де́ньги** аҡса талап итеп алыу **2.** *кого-что* (*по требованию*) саҡыртыу, саҡыртып килтереү (килтертеү); **вы́требовать свиде́теля в суд** судҡа шаһитты саҡыртыу **3.** *кого*; *прост.* (*выписать, вызвать*) саҡыртып алдырыу

**ВЫТРЕЗВИ́ТЕЛЬ** *м* айнытҡыс

**ВЫ́ТРЕЗВИТЬ** *сов. кого-что* айнытыу, айныҡтырыу

**ВЫ́ТРЕЗВИТЬСЯ** *сов.* айныу, айнығыу

**ВЫТРЕЗВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́трезвить**

**ВЫТРЕЗВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **вы́трезвиться**

**ВЫ́ТРЕПАТЬ** *сов. что*; *с.-х.* талҡыу, талҡып алыу; **вы́трепать лён** етен талҡыу

**ВЫТРЯСА́ТЬ** *несов. см.* **вы́трясти**

**ВЫ́ТРЯСТИ** *сов. что* **1.** һелкеп (ҡағып) бушатыу, ҡағып төшөрөү (ташлау); **вы́трясти муку́ из мешка́** ондо тоҡтан ҡағып бушатыу **2.** (*тряся, очистить*) ҡағыу, ҡағып таҙартыу; **вы́трясти ковёр** келәмде ҡағып таҙартыу ♦ **вы́трясти ду́шу** *прост.*: 1) юлда һелкетеп арытыу, йонсотоу; 2) (янап) ҡурҡытыу; **вы́трясти карма́н** *чей*; *прост.* кеҫәһен бушатыу

**ВЫТРЯ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **вы́тряхнуть**

**ВЫТРЯ́ХИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́тряхнуться** **2.** *страд. от* **вытря́хивать**

**ВЫ́ТРЯХНУТЬ** *сов. что* ҡағыу, һелкеү, ҡағып (һелкеп) төшөрөү; **вы́тряхнуть из гало́ш песо́к** калуштан ҡомдо ҡағып төшөрөү

**ВЫ́ТРЯХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һелкенеп төшөп ҡалыу, ҡойолоу

**ВЫ́ТУРИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡыуыу, ҡыуып (төрткөләп) сығарыу

**ВЫТЬ** *несов.* **1.** олоу; **соба́ка вы́ла** эт олоно **2.** олоу, геүләү; **вы́ла сире́на** сирена олоно; **выл фабри́чный гудо́к** фабрика гудогы геүләне **3.** *прост.* (*громко плакать*) олоу, үкереү, үкереп (ҡысҡырып) илау

**ВЫТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **вы́тянуть**

**ВЫТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́тянуться** **2.** *страд. от* **вытя́гивать**

**ВЫ́ТЯЖКА** *ж* **1.** *см.* **вы́тянуть** 1, 4, 6; **вы́тяжка мета́лла** металл һуҙыу; **вы́тяжка га́за** газ һурыу **2.** һығынты; **во́дная вы́тяжка** һыу һығынтыһы

**ВЫТЯЖНО́Й,** -ая, -ое тарта торған, тартыу ...ы, һура торған, һауа һурғыс; **вытяжно́е кольцо́ парашю́та** парашюттың тарта торған дүңгәләге; **вытяжно́й шкаф** һауа һурғыс шкаф

**ВЫ́ТЯНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вы́тянуть** **2.** *прил.* һуҙған, һуҙылған; **вы́тянутые ру́ки** һуҙылған ҡулдар ♦ **вы́тянутое лицо́**; **вы́тянутая физионо́мия** һытыҡ (аптыраулы) сырай

**ВЫ́ТЯНУТЬ** *сов.* **1.** *что* һуҙыу, киреү, тартыу, һуҙып оҙонайтыу, тарттырыу; **вы́тянуть про́волоку** сым һуҙыу; **вы́тянуть ко́жу** тирене киреү **2.** *кого-что* (*бер һыҙыҡҡа*) теҙеү (ҡуйыу); **вы́тянуть дивизио́н в одну́ коло́нну** дивизионды бер колоннаға теҙеү **3.** *что* һуҙыу, һуҙып ебәреү; **вы́тянуть ру́ки** ҡулдарҙы һуҙыу **4.** *что* һурып алыу (сығарыу), тартып алыу (сығарыу); **вы́тянуть гной** эренде һурҙырып алыу **5.** *перен.* тартып алыу (сығарыу); **е́ле-е́ле вы́тянуть сло́во** саҡ-саҡ һүҙен тартып сығарыу **6.** *что* һурыу, һурҙырыу, һурҙырып алыу (сығарыу); **вы́тянуть дым вентиля́цией** вентиляция менән төтөндө һурҙырып алыу **7.** *что*; *разг.* эсеп бөтөү, һемереү; **вы́тянуть стака́н вина́** бер стакан шарапты эсеп бөтөү **8.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*вытерпеть*) сыҙау, түҙеү; **он до́лго не вы́тянет** ул оҙаҡ сыҙай алмаҫ **9.** *кого-что* и *без доп.* (*с трудом выполнить что-л., помочь кому-л.*) һөйрәү, тартыу, һөйрәп (тартып) сығарыу (*берәй эште үтәү, башҡарып сығыу*); **вы́тянуть сла́бого ученика́** йомшаҡ уҡыусыны сығарыу ♦ **вы́тянуть (всю) ду́шу** йәнен яфалау, теңкәһен ҡоротоу

**ВЫ́ТЯНУТЬСЯ** *сов.* **1.** (*растянуться*) һуҙылыу, һуҙылып оҙонайыу; **рези́нка вы́тянулась** резинка һуҙылды **2.** *разг.* (*вырасти*) үҫеү, буйға үҫеү, үҫеп китеү; **за ле́то ма́льчик вы́тянулся** малай йәй эсендә буйға үҫеп киткән **3.** турайыу, тура ҡатып ҡалыу, һуҙылып ятыу; **он стоя́л вы́тянувшись** ул тура ҡатып баҫып тора ине **4.** (*выпрямиться*) тартылыу; **верёвка вы́тянулась струно́й** бау ҡыл кеүек тартылды **5.** (*протянуться*) һуҙылыу, һуҙылып китеү (ятыу); **дере́вня вы́тянулась по бе́регу** ауыл яр буйлап

һуҙылған ♦ **лицо́ (физионо́мия) вы́тянулось** *у кого* сырайы һытылды, йөҙө йәмрәйҙе; **вы́тянуться в стру́нку** туп-тура баҫыу (*торған килеш ҡатып ҡалыу*)

**ВЫ́УДИТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡармаҡлау, ҡармаҡҡа тотоу, ҡармаҡ менән тотоу, ҡармаҡҡа ҡаптырыу **2.** *прост.* алыу, сығарыу, тартып алыу (сығарыу); **вы́удить из карма́на де́ньги** кеҫәнән аҡса тартып сығарыу **3.** *перен.*, *разг.* ауырлыҡ, хәйлә менән алдап алыу (электереү, белеү); **вы́удить подро́бности** хәйлә менән бөтә нескәлектәрен белеү

**ВЫУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́удить**

**ВЫ́УТЮЖИТЬ** *сов. что* үтекләү, үтекләп алыу (бөтөрөү); **вы́утюжить брю́ки** салбарҙы үтекләп алыу

**ВЫУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́учить**

**ВЫУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́учиться 2.** *страд. от* **выу́чивать**

**ВЫ́УЧИТЬ** *сов.* **1.** *что* өйрәнеү, уҡып иҫтә ҡалдырыу, ятҡа белеү, ятлау; **вы́учить уро́к** дәрес өйрәнеү, ятлау; **вы́учить стихотворе́ние** шиғыр ятлау **2.** *кого-что*, *чему* или *с неопр.* өйрәтеү, уҡытыу; **вы́учить игра́ть на гита́ре** *кого-л. кемделер* гитарала уйнарға өйрәтеү **3.** *кого-что*; *разг.* өйрәтеү, аҡылға ултыртыу, кәрәген биреү

**ВЫ́УЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** *чему* или *с неопр.* өйрәнеү, өйрәнеп етеү, өйрәнеп китеү, өйрәнеп алыу; **вы́учиться писа́ть** яҙырға өйрәнеү; **вы́учиться бе́гать на конька́х** конькиҙа йүгерергә өйрәнеп алыу **2.** *разг.* (*приобрести привычку*) ғәҙәтләнеү, өйрәнеү; **вы́учиться кури́ть** тартырға ғәҙәтләнеү **3.** (*закончить учёбу*) уҡып бөтөрөү (сығыу), уҡыуҙы тамамлау

**ВЫ́УЧКА** *ж* **1.** *разг. см.* **вы́учить** 2; **отпра́вить на вы́учку к ма́стеру** мастерға уҡытырға ебәреү **2.** (*умение, навыки*) алған белем, күнекмә

**ВЫХА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́ходить** II

**ВЫ́ХАРКАТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡаҡырыу, ҡаҡырыҡ сығарыу; **вы́харкать мокро́ту** ҡаҡырыҡты сығарыу

**ВЫХА́РКИВАТЬ** *несов. см.* **вы́харкать**

**ВЫ́ХВАТИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тартып (әләктереп) алыу; **вы́хватить из рук нага́н** ҡулдан наганды тартып алыу **2.** *что* тартып (һурып) алыу, тартып (һурып) сығарыу; **вы́хватить са́блю из но́жен** ҡылысты ҡындан һурып алыу **3.** *что*; *перен.* айырып алыу; **вы́хватить цита́ту из те́кста** текстан цитатаны айырып алыу **4.** *что*; *перен.* эләктереп алыу, йолоп алыу **5.** *что*; *разг.* артыҡ күп ҡырҡып алыу, ҙур итеп уйып алыу; **вы́хватить во́рот** яғаны ҙур уйып алыу

**ВЫХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́хватить**

**ВЫ́ХЛОП** *м*; *тех.* (газ, төтөн) сығыу (сығарыу) (*двигателдә янған газдар*)

**ВЫХЛОПНО́Й, -ая, -ое** *тех.* газ (төтөн) сығарыу ...ы; **выхлопна́я труба́** төтөн сығарыу торбаһы

**ВЫ́ХЛОПОТАТЬ** *сов. что* юллап алыу, артынан йөрөп алыу; **вы́хлопотать разреше́ние** рөхсәт юллап алыу

**ВЫ́ХОД** *м* **1.** *см.* **вы́йти** 1—3, 6; **вы́ход на рабо́ту** эшкә сығыу; **вы́ход кораблéй в мо́ре** караптарҙың диңгеҙгә сығыуы; **вы́ход кни́ги в свет** китаптың донъяға сығыуы; **вы́ход из игры́** уйындан сығыу **2.** (*место*) сығыу урыны, сығыу юлы, сығыу ишеге; **запа́сный вы́ход** запас сығыу урыны; **стоя́ть у вы́хода** сығыу юлында тороу **3.** *перен.* сығыу юлы, ҡотолоу юлы (сараһы); **найти́ вы́ход из затрудне́ния** ҡыйынлыҡтан ҡотолоу юлын табыу **4.** (*количество произведённого продукта*) сығыш; **но́рма вы́хода** сығыш нормаһы; **вы́ход зерна́** бөртөклө ашлыҡтың сығышы **5.** (*обнажение горных пород*) сығыу, өҫкә сығыу (ҡалҡыу); **вы́ходы вулкани́ческого ту́фа** вулканик туфтың өҫкә сығыуы ♦ **дать (найти́ и т.п.) вы́ход** *чему* юл ҡуйыу (табыу); **знать все ходы́ и вы́ходы** бөтәһен дә белеп тороу, хәбәрҙар булыу

**ВЫ́ХОДЕЦ** *м* **1.** (*переселенец*) күсеп килгән кеше, килмешәк **2.** (*о социальной среде*) сыҡҡан кеше; **вы́ходец из крестья́н** крәҫтиәндәрҙән сыҡҡан кеше

**ВЫ́ХОДИТЬ I** *сов. что*; *разг.* (*побывать во многих местах*, *исходить*) йөрөп сығыу, гиҙеп сығыу

**ВЫ́ХОДИТЬ II** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*помочь выздороветь*) тәрбиәләп һауыҡтырыу, аяҡҡа баҫтырыу **2.** (*вырастить*) ҡарап (тәрбиәләп) үҫтереү; **вы́ходить здоро́вого ребёнка** сәләмәт бала тәрбиәләп үҫтереү

**ВЫХОДИ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **вы́йти 2.** ҡарау, сығыу; **о́кна выхо́дят в сад** тәҙрәләр баҡсаға ҡарай **3.** *в знач. вводн. сл.*; *разг.* тимәк, шулай итеп; **выхо́дит, вы из Башкортоста́на** тимәк, һеҙ Башҡортостандан инде ♦ **не выходи́ть из головы́ (из ума́)** баштан (иҫтән) сыҡмау

**ВЫ́ХОДКА** *ж* **1.** ҡылыныш, сығыш; **мальчи́шеская вы́ходка** малайҙарса ҡылыныш; **вы́ходка про́тив** *кого-л. кемгәлер* ҡаршы сығыш **2.** *разг.* сығыш, сығыу хәрәкәте (*бейеүҙә*)

**ВЫХОДНО́Й, -ая, -ое 1.** сығыу ...ы, сыға торған; **выходна́я дверь** сыға торған ишек; **выходно́е отве́рстие** сығыу тишеге **2.** (*парадный*) әрле, ҡәҙерлегә кейә торған, кеше араһына кейә торған; **выходно́й костю́м** кеше араһына кейә торған костюм **3.** (*в сочетании с сущ. "день"*) ял ...ы; **выходно́й день** ял көнө **4.** *в знач. сущ.* **выходно́й** *м*; *разг.* ял, ял көнө; **провести́ выходно́й вме́сте** ялды бергә уҙғарыу ♦ **выходно́е посо́бие** эштән киткәндә түләнә торған пособие; **выходна́я роль** бәләкәй (генә) роль (*театрҙа*); **выходны́е све́дения (да́нные)** китаптың нәшер ителеүенә ҡағылышлы мәғлүмәттәр

**ВЫХОДЯ́ЩИЙ: из ря́да вон выходя́щий** ғәҙәттән тыш, бик һирәк була торған

**ВЫХОЛА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **вы́холостить**

**ВЫ́ХОЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вы́холить 2.** *прил.* тәрбиәле, наҙлы, иркә

**ВЫ́ХОЛИТЬ** *сов. кого-что* иркәләп (наҙлап, ҡәҙерләп, тәрбиәләп) үҫтереү (ҡарау); **вы́холить коня́** атты ҡәҙерләп тәрбиәләп үҫтереү

**ВЫ́ХОЛОСТИТЬ** *сов.* **1.** *кого* бестереү, һылылау, көйҙөрөү; **вы́холостить жеребца́** айғырҙы бестереү **2.** *что*; *перен.* асылын юҡ итеү, мәғәнәһен бөтөрөү, мәғәнәһеҙләндереү; **вы́холостить иде́ю** идеяның мәғәнәһен бөтөрөү

**ВЫ́ХУХОЛЬ** *м* и *ж* **1.** йофар **2.** (*мех*) йофар тиреһе

**ВЫ́ЦАРАПАТЬ** *сов. что* **1.** (*царапая, выдрать*) тырнап алыу (бөтөрөү, сығарыу, йыртыу) **2.** *перен.*, *разг.* көскә алыу, көскә эләктереү, электереп алыу, азат итеү; **вы́царапать де́ньги** аҡсаны көскә эләктереү **3.** (*царапая, изобразить*) тырнаҡ менән яҙыу (һыҙыу); **вы́царапать на́дпись** яҙыуҙы тырнаҡ менән яҙыу

**ВЫЦАРА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́царапать**

**ВЫ́ЦВЕСТИ** *сов.* уңыу, уңып бөтөү, төҫһөҙләнеү, төҫө бөтөү (уңыу); **пла́тье вы́цвело** күлдәк уңған

**ВЫЦВЕТА́ТЬ** *несов. см.* **вы́цвести**

**ВЫ́ЦЕДИТЬ** *сов. что* **1.** һөҙөү, һөҙөп алыу (бөтөрөү); **вы́цедить молоко́** һөттө һөҙөү **2.** *прост.* (*медленно выпить*) һемереп эсеү (эсеп бөтөрөү), һемереп ҡуйыу, һемереү **3.** *перен.*, *прост.* (*сказать очень медленно*) теште ҡыҫып әйтеү, теш араһынан һығып сығарыу

**ВЫЦЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **вы́цедить**

**ВЫЧЕКА́НИВАТЬ** *несов. см.* **вы́чеканить**

**ВЫ́ЧЕКАНИТЬ** *сов. что* ҡойоп (сүкеп, һуғып) яһау (төшөрөү); **вы́чеканить моне́ту** аҡса һуғыу

**ВЫЧЁРКИВАТЬ** *несов. см.* **вы́черкнуть**

**ВЫ́ЧЕРКНУТЬ** *сов. кого-что* һыҙыу, һыҙып ташлау; **вы́черкнуть фами́лию из спи́ска** фамилияны исемлектән һыҙып ташлау

**ВЫ́ЧЕРПАТЬ** *сов. что* һоҫоп алып бөтөрөү, һоҫоп алыу; **вы́черпать во́ду** һыуҙы һоҫоп алып бөтөү

**ВЫЧЕ́РПЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́черпать**

**ВЫ́ЧЕРТИТЬ** *сов. что* һыҙыу, һыҙып төшөрөү (әҙерләү); **вы́чертить план райо́на** райондың планын һыҙыу

**ВЫЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́чертить**

**ВЫ́ЧЕСАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*гребнем, расчёской*) тарау, тарап алыу (сығарыу); **вы́чесать пе́рхоть из воло́с** сәстән ҡауаҡты тарап сығарыу **2.** *что* (*очистить, обработать*) тарау, тарап эшкәртеү (таҙартыу), тәрәшләү, тәрәшләп бөтөрөү (сығыу); **вы́чесать лён** етенде тәрәшләү

**ВЫ́ЧЕСТЬ** *сов. что* **1.** алыу, алып ташлау; **вы́честь два из пяти́** биштән икене алыу **2.** тотоп ҡалыу (алып ҡалыу), тотоу; **вы́честь задо́лженность** бурысты тотоп алып ҡалыу

**ВЫЧЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́чесать**

**ВЫ́ЧЕТ** *м* **1.** *см.* **вы́честь 2.** (*удержанная сумма*) тотоп ҡалынған аҡса, тотолған аҡса; **сде́лать вы́чет** аҡса тотоп алып ҡалыу; **вы́чет за страхо́вку** страховка өсөн аҡса тотоп ҡалыу ♦ **за вы́четом** иҫәпкә алмағанда

**ВЫЧИСЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вы́числить**; **вычисле́ние проце́нтов** процентттар иҫәпләп сығарыу **2.** хисаплау (иҫәпләү) һөҙөмтәһе, хисаплап (иҫәпләп) сығарыу; **вычисле́ния бухга́лтера** бухгалтерҙың иҫәпләп сығарыуы

**ВЫЧИСЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҫәпләү (хисаплау) ...ы, иҫәпләп (хисаплап) сығарыу ...ы; **вычисли́тельные рабо́ты** иҫәпләү эштәре **2.** иҫәпләү ...ы, иҫәпләй торған; **вычисли́тельные маши́ны** иҫәпләү машиналары

**ВЫ́ЧИСЛИТЬ** *сов. что* хисаплау, иҫәпләү, хисаплап (иҫәпләп) сығарыу; **вы́числить ско́рость и направле́ние движе́ния льдов** боҙҙарҙың хәрәкәт тиҙлеген һәм йүнәлешен иҫәпләп сығарыу

**ВЫЧИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́числить**

**ВЫ́ЧИСТИТЬ** *сов. что* таҙартыу, таҙартып (ҡуйыу) алыу; **вы́чистить пальто́** пальтоны таҙартыу

**ВЫ́ЧИСТИТЬСЯ** *сов.* таҙарыныу, таҙарынып алыу

**ВЫЧИТА́ЕМОЕ** *с*; *мат.* алыусы, кәметеүсе

**ВЫЧИТА́НИЕ** *с*; *мат.* алыу, алыу ғәмәле; **пра́вила вычита́ния** алыу ҡағиҙәһе

**ВЫ́ЧИТАТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* (*читая, узнать*) уҡып белеү (алыу) **2.** *спец.* (*читая, исправить*) уҡып төҙәтеү, уҡып, төҙәтеп сығыу; **вы́читать ру́копись** ҡулъяҙманы уҡып, төҙәтеп сығыу

**ВЫЧИТА́ТЬ** *несов. см.* **вы́честь**

**ВЫЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́читать**

**ВЫЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **вы́чистить**

**ВЫЧИЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́чиститься 2.** *страд. от* **вычища́ть**

**ВЫ́ЧУРНОСТЬ** *ж* бормалы-һырмалылыҡ, үтә ҡупшылыҡ, ҡабарынҡы; **вы́чурность языка́** телдең үтә ҡупшылығы

**ВЫ́ЧУРНЫЙ,** -ая, -ое бормалы-һырмалы, үтә ҡупшы, үтә (артыҡ) семәрле, артыҡ биҙәкле; **вы́чурный стиль** артыҡ семәрле стиль; **вы́чурная ра́ма** артыҡ биҙәкле рама

**ВЫША́ГИВАТЬ** *несов.*; *разг.* атлау, атлап йөрөү (*әре йәки тигеҙ аҙымдар менән*); **в волне́нии выша́гивать по ко́мнате** тулҡынланыуҙан бүлмә буйлап атлап йөрөү

**ВЫШВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **вы́швырнуть**

**ВЫ́ШВЫРНУТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** (*выбросить*) быраҡтырыу, алып бырғау, алып бәреү, ырғытыу, алып ташлау; **вы́швырнуть буты́лку** шешәне атып бәреү **2.** (*вытолкнуть, выгнать*) төрткөләп сығарыу, сығарып ташлау, ҡыуып сығарыу

**ВЫ́ШЕ 1.** *сравн. ст. от* **высо́кий** и **высоко́** бейегерәк, юғарыраҡ **2.** *нареч.* юғары, өҫкә, юғарыраҡ, өҫкәрәк; **пяти́ лет и вы́ше** биш һәм унан юғарыраҡ йәштәге; **на шесто́й эта́ж и вы́ше** алтынсы ҡатҡа һәм өҫкәрәк **3.** *предлог с род. п.* (*вне, сверх чего-л.*) тыш, юғарыраҡ, өҫтөнөрәк; **быть вы́ше предрассу́дков** хөрәфәттәрҙән өҫтөнөрәк булыу **4.** *предлог с род. п.* (*вверх по течению от какого-л. места*) өҫтәрәк, юғарыраҡ, өҫтә, юғарыла; **вы́ше при́стани** пристандан юғарыраҡ **5.** *нареч.* юғарыла, бынан алда, өҫтә, юғарыраҡ, өҫтәрәк, бынан элек; **об э́том говори́лось вы́ше** был турала юғарыла әйтелде

**ВЫШЕ...** *урыҫ теләндәге ҡушма һүҙҙәрҙең "өҫтә", "юғарыла", "бынан алда", "бынан элек" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **вышеприведённый** юғарыла килтерелгән; **вышеска́занный** алда әйтелгән

**ВЫШЕСТОЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее юғары, юғарылағы; **вышестоя́щие о́рганы** юғары органдар

**ВЫШИБА́ТЬ** *несов. см.* **вы́шибить**

**ВЫ́ШИБИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* һуғып (бәреп) сығарыу, һуғып (бәреп) төшөрөү, сығара һуғыу; **вы́шибить шпа́гу из руки́** шпаганы ҡулынан һуғып төшөрөү; **вы́шибить око́нную ра́му** тәҙрә рамын бәреп сығарыу **2.** *кого* ҡыуып сығарыу; **вы́шибить проти́вника из дере́вни** дошманды ауылдан ҡыуып сығарыу ♦ **вы́шибить дух (ду́шу)** *из кого* һуғып (бәреп) үлтереү

**ВЫШИВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сигеү ...ы, сиген ...ы; **вышива́льные ни́тки** сигеү ептәре

**ВЫШИВА́ЛЬЩИЦА** *ж* сигеүсе (ҡатын-ҡыҙ)

**ВЫШИВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **вышива́ть**; **обуча́ться вышива́нию** сигеүгә өйрәнеү **2.** (*вышиваемая вещь*) сигеү, сиген, сиккән нәмә

**ВЫШИВА́ТЬ** *несов. см.* **вы́шить**

**ВЫ́ШИВКА** *ж* **1.** *см.* **вы́шить**; **занима́ться вы́шивкой** сигеү менән шөғөлләнеү **2.** (*узор*) сигелгән биҙәк, семәр, нағыш, ҡайма; **наря́дная вы́шивка** матур сигеү; **пла́тье с вы́шивкой** нағышлы күлдәк

**ВЫШИВНО́Й,** -ая, -ое *разг.* сиккән, сигелгән; **вышивно́й воротни́к** сигеүле яға; **вышивны́е рукава́** сигелгән еңдәр

**ВЫШИНА́** *ж* **1.** бейеклек, оҙонлоҡ; **столб вышино́ю в са́жень** бер сажин бейеклегендәге бағана **2.** юғарылыҡ, юғары; **звёзды поблёскивают в вышине́** юғарыла йондоҙҙар йымылдай

**ВЫ́ШИТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **вы́шить** **2.** *прил.* сигеүле, ҡайыулы, нағышлы; **вы́шитая руба́шка** сигеүле күлдәк

**ВЫ́ШИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*украсить узорным шитьём*) сигеү, сигеп биҙәү; **вы́шить узо́р** биҙәк сигеү; **вы́шить гла́дью** шыма сигеү менән сигеү **2.** *кого-что* (*изобразить*) сигеү, сигеп төшөрөү, сигеп эшләү (яһау); **вы́шить ме́тки на белье́** түшәк кәрәк-ярағына сигеп билдә яһау

**ВЫ́ШКА** *ж* вышка; **бурова́я вы́шка** быраулау вышкаһы; **прыжо́к в во́ду с вы́шки** вышканан һыуға һикереү

**ВЫ́ШКОЛИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тәртипкә өйрәтеү, тәрбиә биреү, өйрәтеү; **вы́школить ма́льчика** малайҙы тәртипкә өйрәтеү

**ВЫ́ШЛИФОВАТЬ** *сов. что* **1.** шымартыу, ышҡып шымартыу **2.** *перен.*, *разг.* әҙәпкә индереү, тәртипкә өйрәтеү

**ВЫ́ШЛИФОВАТЬСЯ** *сов.* **1.** шымарыу **2.** *перен.*, *разг.* әҙәпкә инеү, тәртипкә өйрәнеү

**ВЫ́ШУТИТЬ** *сов. кого-что* көлкөгә ҡалдырыу, өҫтөнән көлөү

**ВЫШУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́шутить**

**ВЫЩЕЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **вы́щелочить**

**ВЫЩЕЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́щелочиться** **2.** *страд. от* **выщела́чивать**

**ВЫ́ЩЕЛОЧИТЬ** *сов. что*; *тех.*, *хим.* шыйыҡса менән иретеп сығарыу (иретеп алыу); **вы́щелочить дуби́льные вещества́ из древеси́ны** үҙағастан дуплау матдәләрен шыйыҡса менән иретеп алыу

**ВЫ́ЩЕЛОЧИТЬСЯ** *сов.*; *тех.*, *хим.* ireп сығыу (*шыйыҡса тәьҫирендә*)

**ВЫ́ЩЕРБИТЬ** *сов. что*; *разг.* киртмәкләү, суғырмаҡлау, сирылтыу; **вы́щербить топо́р** балтаны сирылтыу

**ВЫ́ЩЕРБИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* киртмәкләнеү, суғырмаҡланыу, сирылыу

**ВЫЩЕРБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́щербить**

**ВЫЩЕРБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́щербиться** **2.** *страд. от* **выщербля́ть**

**ВЫ́ЩИПАТЬ** *сов. что* йолҡоу, йолҡоп бөтөрөү, йолҡҡолау, өҙөү, өҙгөләү; **вы́щипать пе́рья** йөн йолҡоу; **вы́щипать траву́** үләнде йолҡоп бөтөрөү

**ВЫ́ЩИПНУТЬ** *сов. что* йолҡоу, йолҡоп алыу (сығарыу); **вы́щипнуть перо́** ҡауырһынды йолҡоп алыу

**ВЫЩИ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **вы́щипать**

**ВЫ́ЯВИТЬ** *сов.* **1.** *что* күрһәтеү, асып биреү; **вы́явить свой тала́нт** үҙ талантын күрһәтеү **2.** *кого-что* фашлау, асыу, асыҡлау; **вы́явить престу́пника** енәйәтсене фашлау; **вы́явить недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе асыу

**ВЫ́ЯВИТЬСЯ** *сов.* фашланыу, асылыу, асыҡланыу, беленеү; **вы́явились оши́бки** хаталар асыҡланды

**ВЫЯВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́явить**

**ВЫЯВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́явиться** **2.** *страд. от* **выявля́ть**

**ВЫ́ЯСНИТЬ** *сов. что* асыҡлау, аныҡлау, (асыҡлап) белеү; **вы́яснить обстано́вку** хәлде асыҡлау

**ВЫ́ЯСНИТЬСЯ** *сов.* асыҡланыу, аныҡланыу, беленеү, аңлашылыу

**ВЫЯСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **вы́яснить**

**ВЫЯСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **вы́ясниться 2.** *страд. от* **выясня́ть**

**ВЬЕТНА́МСКИЙ,** -ая, -ое вьетнам(дар) ...ы, Вьетнам ...ы; **вьетна́мский язы́к** вьетнам теле

**ВЬЕТНА́МЦЫ** *мн.* вьетнамдар, вьетнам халҡы // *ед.* **вьетна́мец** *м* вьетнам ир-аты; **вьетна́мка** *ж* вьетнам ҡатын-ҡыҙы

**ВЬЮ́ГА** *ж* буран, ыжғыр буран

**ВЬЮ́ЖНО 1.** *нареч.* буранлы **2.** *в знач. сказ., безл.* буранлау, буран булыу; **сего́дня вьюжно** бөгөн буранлай

**ВЬЮ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое буранлы; **вью́жная пого́да** буранлы көн; **вью́жный ве́тер** буранлы ел

**ВЬЮК** *м* йөк (*хайуан өҫтөндәге*), артмаҡ

**ВЬЮН** *м* **1.** *зоол.* (*рыба*) эт балығы, һаҡалсан **2.** *разг.* (*о ловком или пронырливом человеке*) йылғыр, етеҙ (*кеше*) **3.** *прост.* өйөрмә (*ҡар, һыу һ.б.*)

**ВЬЮНО́К** *м* сырмалсыҡ, эт эсәге; **вьюно́к полево́й** эт эсәге (*ҡый үләне*)

**ВЬЮРО́К** *м* алаҡас турғай

**ВЬЮ́ЧИТЬ** *несов. кого-что* артмаҡлау, артыу (*атҡа, дөйәгә һ.б.*)

**ВЬЮ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йөк ...ы, артмаҡ ...ы; **вью́чные ремни́** артмаҡ ҡайыштары **2.** йөк ...ы, артмаҡ ...ы, йөк йөрөтә торған, артмаҡ йөрөтә торған, йөклө, артмаҡлы; **вью́чное седло́** артмаҡ эйәре; **вью́чное живо́тное** йөк йөрөтә торған хайуан

**ВЬЮ́ШКА** *ж* йүшкә, мөрйә япҡысы

**ВЬЮ́ЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **ви́ться 2.** *прил.* уралыусан, сырмалсыҡ, сырмалыусан, үрмәле; **вью́щееся расте́ние** сырмалыусан үҫемлек **3.** *прил.* (*волнистый*) бөҙрә, тулҡынланып торған; **вью́щиеся во́лосы** бөҙрә сәс

**ВЯ́ЖУЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **вяза́ть 2.** *прил.* (*терпкий*) ҡурыштырыусан, (ауыҙ) ҡурыша торған; **вя́жущее лека́рство** ауыҙ ҡурыштыра торған дарыу **3.** *прил.*; *тех.* бәйләүсе, ҡатырғыс, беркеткес; **вя́жущие материа́лы** ҡатырғыс материалдар

**ВЯЗ** *м* ҡарама (*ағас*)

**ВЯЗА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бәйләү ...ы, бәйләй торған; **вяза́льная маши́на** бәйләү машинаһы

**ВЯЗА́ЛЬЩИК** *м* и **ВЯЗА́ЛЬЩИЦА** *ж* бәйләүсе; **вяза́льщик снопо́в** көлтә бәйләүсе ир

**ВЯЗА́НИЕ** *с см.* **вяза́ть** 1, 3; **вяза́ние снопо́в** көлтә бәйләү; **вяза́ние носко́в** ойоҡбаш бәйләү

**ВЯЗА́НКА** *ж*; *разг.* (бер) ҡосаҡ, (бер) бәйләм, (бер) бау; **вяза́нка дров** бер ҡосаҡ утын; **вяза́нка соло́мы** бер бәйләм һалам

**ВЯ́ЗАНЫЙ,** -ая, -ое бәйләнгән, бәйләм; **вя́заная ко́фта** бәйләнгән кофта

**ВЯЗА́НЬЕ** *с* (*вещь*) бәйләм; **взять в ру́ки вяза́нье** бәйләмде ҡулға алыу

**ВЯЗА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* бәйләү; **вяза́ть ве́ники** миндек бәйләү **2.** *кого-что* бәйләү, аяҡ-ҡулды бәйләү, бәйләп тотоу; **вяжи́те его́** бәйләгеҙ уны **3.** *что* бәйләү; **вяза́ть крючко́м** ырғаҡ энә менән бәйләү; **вяза́ть носки́** ойоҡбаш бәйләү **4.** *что* и *без доп.* ҡурыштырыу, ҡурышыу; **черёмуха вя́жет рот** муйыл ауыҙҙы ҡурыштыра; **во рту вя́жет** *безл.* ауыҙ ҡурыша **5.** *что*; *тех.* (*скреплять*) ойҡаштырыу, беркетеү; **вяза́ть кирпичи́ цеме́нтом** кирбестәрҙе цемент менән беркетеү

**ВЯЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с чем* (*согласовываться*) тура (тап) килеү, ярашыу **2.** *страд. от* **вяза́ть** ♦ **не вя́жется (де́ло, разгово́р)** (эш, һүҙ) килеп сыҡмай (*рәте юҡ, көйө юҡ*)

**ВЯ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **вяза́ть** 1, 3, 5; **вя́зка снопо́в** көлтә бәйләү **2.** *прост.* бау; **вя́зка ключе́й** бер бау асҡыстар

**ВЯ́ЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** йәбешкәк, йәбешеүсән, үҙле, һуҙылыусан; (*о снеге*) һыҡы, епшек; **вя́зкое вещество́** йәбешкәк матдә; **вя́зкая гли́на** үҙле балсыҡ **2.** батҡаҡлы, батҡыл, төпкә тартҡан; **вя́зкое дно реки́** йылғаның батҡыл төбө; **вя́зкая доро́га** батҡаҡлы юл **3.** *разг. см.* **вя́жущий** 2

**ВЯ́ЗКОСТЬ** *ж* йәбешкәклек, үҙлелек, һуҙылыусанлыҡ; **вя́зкость гли́ны** балсыҡтың үҙлелеклеге

**ВЯ́ЗНУТЬ** *несов.* **1.** батыу, батҡылға төшөү, аяҡ батыу; **вя́знуть в снегу́** ҡарҙа батыу **2.** (*увязая, погибать*) батып үлеү, төшөп батыу; **вя́знуть в тряси́не** батҡылға батып үлеү **3.** *разг.* (*застревать*) ҡыҫылыу, инеп ҡалыу; **мя́со вя́знет в зуба́х** ит тешкә ҡыҫыла

**ВЯЗЬ** *ж* **1.** (*узор*) үрелмә, үрелмә биҙәк **2.** семәрле яҙыу, үрелдереп яҙыу; **ара́бская вязь** семәрле ғәрәп яҙыуы

**ВЯ́ЛЕНЫЙ,** -ая, -ое ҡаҡланған, кипкән; **вя́леное мя́со** ҡаҡланған ит

**ВЯ́ЛИТЬ** *несов. что* ҡаҡлау, киптереү

**ВЯ́ЛИТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡаҡланыу, кибеү (*асыҡ һауала*) **2.** *страд. от* **вя́лить**

**ВЯ́ЛОСТЬ** *ж* **1.** бәлтерәү, һәлперәйеү; **вя́лость мышц** мускулдарҙың бәлтерәүе **2.** (*отсутствие энергии*) һүлпәнлек, дәртһеҙлек, һүрәнлек

**ВЯ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о растениях*) һулыған, шиңгән, быжыған; **вя́лая сире́нь** һулыған сирень **2.** бәлтерәгән, һәлперәйгән; **вя́лые мы́шцы** бәлтерәгән мускулдар **3.** һүлпән, дәртһеҙ, төшөнкө; **вя́лое настрое́ние** төшөнкө кәйеф; **вя́лый ма́льчик** һүлпән малай

**ВЯ́НУТЬ** *несов.*; *прям.*, *перен.* һулыу, шиңеү, быжыу

**ВЯ́ХИРЬ** *м* эберсен, ала күгәрсен

**ВЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее *уст.*, *книжн.* ҙурыраҡ, көслөрәк, күберәк, ныҒыраҡ; **для вя́щей убеди́тельности** ныҒыраҡ ышандырыу өсөн

# Г

**ГАБАРДИ́Н** *м* габардин (*туҡыма төрө*); **чёрный габарди́н** ҡара габардин

**ГАБАРДИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое габардин; **габарди́новый костю́м** габардин костюм

**ГАБАРИ́Т** *м* габарит (**1.** *машина, күпер, вагон кеүек нәмәләрҙең тышҡы һыҙаты һәм күләме* **2.** *тимер юл буйында бер нindәй ҙә ҡоролма төҙөргә рөхсәт ителмәй торған аралыҡ*)

**ГАБАРИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое габарит …ы ♦ **габари́тные воро́та** *ж.-д.* габарит ҡапҡалары

**ГАВА́НСКИЙ: гава́нская сига́ра** *уст.* гавана сигараһы

**ГА́ВАНЬ** *ж* гавань (*диңгеҙ йәки йылға буйының караптар туҡтар өсөн хеҙмәт иткән ышыҡ урыны*); **есте́ственная га́вань** тәбиғи гавань; **незамерза́ющая га́вань** туңмай торған гавань

**ГАВ-ГА́В** *межд.* һау-һау, арҫ-арҫ

**ГА́ВКАТЬ** *несов.*; *прост.* һауылдау, һаулау, арҫылдау

**ГА́ВКНУТЬ** *сов.* һау итеп ҡалыу

**ГА́ГА** *ж* гага (*поляр диңгеҙ өйрәге*)

**ГАГА́РА** *ж* гагара (*төньяҡ диңгеҙҙәрҙәге эре һыу ҡошо*)

**ГАГА́РИЙ,** -ья, -ье гагара …ы; **гага́рье гнездо́** гагара ояһы

**ГАГАУ́ЗСКИЙ,** -ая, -ое гагауз …ы; **гагау́зский язы́к** гагауз теле

**ГАГАУ́ЗЫ** *мн.* гагауздар, гагауз халҡы // *ед.* **гагау́з** *м* гагауз ир-аты; **гагау́зка** *ж* гагауз ҡатын-ҡыҙы

**ГАГА́ЧИЙ,** -ья, -ье гага …ы; **гага́чий пух** гага мамығы

**ГАД** *м* **1.** *обычно мн.* **га́ды** хәшәрәт, һөйрәлеүсе (*йылан, баҡа һ.б.*) **2.** *прост., бран.* хәшәрәт (әшәке) кеше

**ГАДА́ЛКА** *ж* күрәҙә, күрәҙәсе, фал асыусы, ноҡотсо (ҡатын-ҡыҙ)

**ГАДА́НИЕ** *с см.* **гада́ть**; **занима́ться гада́нием** күрәҙәлек итеү

**ГАДА́ТЬ** *несов.* **1.** бағымсылау, күрәҙәлек итеү, ноҡот (фал) һалыу **2.** *о чём*; *разг.* (*предполагать*) фараз итеү, самалау, тип уйлау; **гада́ть о наме́рениях** *чьих-л. кемдеңдер* уй-ниәте хаҡында фараз итеү ♦ **гада́ть на кофе́йной гу́ще** бушҡа күрәҙәлек итеү, буш фараз менән булыу; **не ду́мал, не гада́л** башҡа ла килмәне; уйға ла инеп сыҡманы; ике ятып, бер төшкә инмәне

**ГА́ДИНА** *ж*; *прост., бран.* хәшәрәт, әшәке, ҡәбәхәт

**ГА́ДИТЬ** *несов.* **1.** *разг.* бысратыу, шаҡшылау (*хайуанға, ҡош-ҡортҡа ҡарата*) **2.** *кому*; *прост.* (*вредить*) бысраҡлыҡ (боҙоҡлоҡ) эшләү

**ГА́ДКИЙ,** -ая, -ое ерәнес, әшәке, ҡәбәхәт; **га́дкий челове́к** әшәке кеше; **га́дкие слова́** ерәнес һүҙҙәр

**ГА́ДКО 1.** *нареч.* алама, насар; **га́дко поступи́ть** алама эш эшләү **2.** *в знач. сказ.* әшәке, алама; **его́ поведе́ние га́дко** уның ҡыланышы әшәке

**ГАДЛИ́ВОСТЬ** *ж* ерәнеслек, әшәкелек; **чу́вство гадли́вости** ерәнеслек тойғоһо

**ГАДЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ерәнес, сикәнес, әшәке; **гадли́вое чу́вство** әшәке хис

**ГА́ДОСТЬ** *ж*; *разг.* **1.** бысраҡ (әшәке) нәмә; **вы́брось э́ту га́дость** ташла шул бысраҡ нәмәне **2.** (*низкий поступок*) насарлыҡ, аламалыҡ, әшәкелек; **наде́лать га́достей** насарлыҡ эшләп ташлау **3.** (*мерзкие слова*) ояттыҙ (әҙәпһеҙ) һүҙҙәр; **говори́ть га́дости** әҙәпһеҙ һүҙҙәр һөйләү

**ГАДЮ́КА** *ж* ҡара йылан

**ГА́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое гайка …ы; **га́ечный ключ** гайка асҡысы; **га́ечная резьба́** гайка һыры

**ГАЗ I** *м* газ; **приро́дный газ** тәбиғи газ; **слезоточи́вый газ** йәш ағыҙыусы газ; **уду́шливый газ** тонсоҡторғос газ; **ядови́тый газ** ағыулы газ; **га́зы в кише́чнике** эсәктәге газ ♦ **дать газ** газ биреү (*тиҙлекте арттырыу өсөн*); **на по́лном га́зе (газу́)** иң ҙур тиҙлектә; **сба́вить газ** газды кәметеү (*тиҙлекте кәметеү өсөн*)

**ГАЗ II** *м* газ (*туҡыма*); **шарф из га́за** газ шарф

**ГАЗАВА́Т** *м* ғәзәуат (*мосолмандарҙың ислам өсөн һуғышы*)

**ГАЗАНУ́ТЬ** *сов.*; *прост.* газға баҫып ебәреү

**ГАЗГО́ЛЬДЕР** *м* газгольдер (*газды туплау, һаҡлау һәм газ үткәргес селтәргә ебәреү яйланмаһы*)

**ГАЗЕ́ЛЬ I** *ж* ғәзәл (*антилопа төрө*)

**ГАЗЕ́ЛЬ II** *ж*; *лит.* ғәзәл (*Көнсығыш поэзияһында күп ижекле ике юллыҡ строфаларҙан торған аралаш рифмалы лирик шиғыр формаһы*); **класси́ческие образцы́ газе́ли** ғәзәлдең классик өлгөләре

**ГАЗЕ́ТА** *ж* гәзит; **вече́рняя газе́та** киске гәзит; **молодёжная газе́та** йәштәр гәзите; **подписа́ться на газе́ту** гәзиткә яҙылыу

**ГАЗЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое гәзит …ы; **газе́тное сообще́ние** гәзит хәбәре; **газе́тная статья́** гәзит мәҡәләһе; **газе́тный язы́к** гәзит теле

**ГАЗЕ́ТЧИК** *м*; *разг.* **1.** гәзитсе, гәзит хеҙмәткәре; **о́пытный газе́тчик** тәжрибәле гәзитсе **2.** гәзитсе, гәзит һатыусы (*урамда*)

**ГА́ЗИК** *м*; *разг.* газик (*ГАЗ маркалы автомобиль*)

**ГАЗИ́РОВАНИЕ** *с см.* **гази́ровать**

**ГАЗИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **гази́ровать 2.** *прил.* газлы; **газиро́ванная вода́** газлы һыу

**ГАЗИ́РОВАТЬ** *несов. что* газлау, газландырыу; **гази́ровать во́ду** һыуҙы газлау

**ГАЗИРО́ВКА** *ж*; *разг.* газлы һыу; **пить газиро́вку** газлы һыу эсеү

**ГАЗИФИКА́ТОР** *м* газификатор (*һөнәр*); **рабо́тать газифика́тором** газификатор булып эшләү

**ГАЗИФИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** газификация (*ҡаты яғыулыҡты газға әйләндереү*) **2.** газ үткәреү, газ менән тәьмин итеү; **проводи́ть газифика́цию** газ үткәреү

**ГАЗИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** газға әйләндереү; **газифици́ровать у́голь** күмерҙе газға әйләндереү **2.** газ индереү, газ үткәреү, газификациялау; **газифици́ровать кварти́ры** фатирҙарға газ индереү

**ГАЗИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **газифици́ровать**

**ГАЗО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "газ", "газлы" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.*, **газотурби́на** газ турбинаһы

**ГАЗОБАЛЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое газ баллондары ...ы, газ баллонлы; **газобалло́нный автомоби́ль** газ баллонлы автомобиль

**ГАЗОБЕЗОПА́СНЫЙ,** -ая, -ое газ ҡурҡынысы булмаған; **газобезопа́сная зо́на** газ ҡурҡынысы булмаған зона

**ГАЗОВА́ТЬ** *несов.*; *прост.* газға баҫыу (*автомашинала, самолётта һ.б. газды көсәйтеп, тиҙлекте арттырыу*)

**ГАЗОВИ́К** *м*; *разг.* газовик, газсы (*газ сәнәғәтендә эшләүсе*)

**ГАЗОВЩИ́К** *м* газсы (*газификация эшендә эшләүсе*); **рабо́тать газовщико́м** газсы булып эшләү

**ГА́ЗОВЫЙ I,** -ая, -ое газ ...ы; **га́зовая ата́ка** газ һөжүме; **га́зовая плита́** газ плитәһе; **га́зовая промы́шленность** газ сәнәғәте; **га́зовое отопле́ние** газ менән йылытыу ♦ **га́зовая гангре́на** газ гангренаһы (*анаэроб бактерия менән ағыуланған йәрәхәттә барлыҡҡа килгән ҡаты ауырыу*); **га́зовая ре́зка** газ менән ҡырҡыу (*металды*); **га́зовая сва́рка** газ менән иретеп йәбештереү

**ГА́ЗОВЫЙ II,** -ая, -ое газ; **га́зовый шарф** газ шарф (*үтә күренмәле туҡыма*)

**ГАЗОГЕНЕРА́ТОР** *м* газогенератор (*ҡаты йәки шыйыҡ яғыулыҡты газға әйләндерә торған аппарат*)

**ГАЗОГЕНЕРА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое газогенератор ...ы; **газогенера́торная устано́вка** газогенератор ҡоролмаһы

**ГАЗОЛИ́Н** *м* газолин (*нефттән ҡыуып алынған шыйыҡ яғыулыҡ*)

**ГАЗОЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое газолин ...ы; **газоли́новый дви́гатель** газолин менән эшләй торған двигатель

**ГАЗОМЕ́Р** *м* газомер, газ үлсәгес; **установи́ть газоме́р** газомер ҡуйыу

**ГАЗО́МЕТР** *м* газометр (*һауыт*); **измеря́ть газо́метром** газометр менән үлсәү

**ГАЗО́Н** *м* газон (*баҡсала, паркта үлән сәселгән, йәки үләне тигеҙ итеп ҡырҡылған майҙансыҡ*)

**ГАЗОНЕПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* газ үткәрмәүсәнлек

**ГАЗОНЕПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое газ үткәрмәүсән (үткәрмәй торған)

**ГАЗОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое газлы, газы булған; **газоно́сный пласт** газлы ҡатлам

**ГАЗООБМЕ́Н** *м*; *биохим.* газ алмашыныу (*тере организмда*)

**ГАЗООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое газ хәлендәге; **газообра́зное вещество́** газ хәлендәге матдә

**ГАЗОПРОВО́Д** *м* газ торбаһы (*газ ебәреү торбаһы*); **магистра́льный газопрово́д** магистраль газ торбаһы

**ГАЗОПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* газ үткәреүсәнлек

**ГАЗОПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое газ үткәреүсән

**ГАЗОУБЕ́ЖИЩЕ** *с* газдан һаҡланыу урыны

**ГАЗОХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* газ һаҡлау урыны

**ГАЙДАМА́К** *м*; *ист.* **1.** гайдамак (*XVIII б. поляк алпауыттарына ҡаршы баш күтәргән украин казагы*) **2.** *мн.* **гайдама́ки** гайдамактар (*1918—1920 йй. Граждандар һуғышы ваҡытында Украинала совет власына ҡаршы көрәшкән отрядтар*)

**ГАЙДУ́К** *м*; *ист.* гайдук (*XV—XIX бб. Балҡан илдәрендә һәм Венгрияла төрөк хакимлығына ҡаршы көрәштә ҡатнашыусы*)

**ГА́ЙКА** *ж* гайка; **завинти́ть га́йку** гайканы бороу; **осла́бить га́йку** гайканы бушатыу ♦ **закрути́ть (подкрути́ть) га́йки** талапты көсәйтеү

**ГАЙМОРИ́Т** *м*; *мед.* гайморит (*танау эсенең лайлалы ҡатламының шешеүе*)

**ГА́ЙМОРОВ: га́йморова по́лость** *анат.* гаймор ҡыуышлығы (*өҫкө теш ҡаҙналығының танау эргәһендәге һөйәк ҡыуышлығы*)

**ГАК I** *м*; *мор.* гак (*ҡорос ырғаҡ*)

**ГАК II: с га́ком** артығы менән, -тан артығыраҡ; **два киломе́тра с га́ком** ике километрҙан артығыраҡ

**ГАЛА́КТИКА** *ж* галактика (*йыһан киңлегендә йондоҙҙар системаһы*)

**ГАЛАКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое галактика ...ы; **галакти́ческие тума́нности** галактика томанлыҡтары

**ГАЛАНТЕРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое галантерея ...ы; **галантере́йные това́ры** галантерея тауарҙары

**ГАЛАНТЕРЕ́Я** *ж* галантерея (*көнкүрештә, шәхси гигиенала ҡулланылған ваҡ-төйәк нәмәләр: төймә, еп, тараҡ, сумка һ.б.*)

**ГАЛА́НТНОСТЬ** *ж* нәзәкәтлелек, түбәнселек

**ГАЛА́НТНЫЙ,** -ая, -ое нәзәкәтле, түбәнселекле, ихтирамлы

**ГАЛДЁЖ** *м*; *прост.* сыр-сыу, шау-шыу; **подня́ть галдёж** сыр-сыу ҡуптарыу

**ГАЛДЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* сыр-сыу (шау-шыу) килеү; **де́ти галдя́т** балалар сыр-сыу килә

**ГАЛЕ́РА** *ж*; *ист.* галера (*күп ишкәкле ҙур хәрби кәмә*)

**ГАЛЕРЕ́Я** *ж* галерея (**1.** *ике бинаны тоташтырған коридор кеүек оҙон аралыҡ* **2.** *шахта, хәрби нығытма кеүек нәмәнең ике өлөшөн тоташтырған ер аҫты юлы* **3.** *театрҙа, циркта һ.б. иң юғары ярус* **4.** *сәнғәт әҫәрҙәрен һ.б. күрһәтеү өсөн ҡуя торған махсус бина* **5.** *образдар теҙмәһе*); **стекля́нная галере́я** быяла галерея; **заня́ть ме́сто на галере́е** галереянан урын алыу; **карти́нная галере́я** картина галереяһы; **галере́я литерату́рных о́бразов** әҙәби образдар галереяһы

**ГАЛЁРКА** *ж*; *разг.* галёрка (*театрҙа, циркта һ.б. иң юғары ярус*); **сиде́ть на галёрке** галёркала ултырыу

**ГАЛЕ́ТА** *ж* галет (*коро печенье*)

**ГА́ЛЕЧНИК** *м* ҡырсынташлыҡ

**ГА́ЛЕЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡырсынташлы; **га́лечный пляж** ҡырсынташлы һыу ингес

**ГАЛИМАТЬЯ́** *ж*; *прост.* сафсата, юҡ-бар; **нести́ галиматью́** юҡ-бар һөйләү

**ГАЛИФЕ́** *с нескл.* галифе (*балтыры тар хәрби салбар*)

**ГА́ЛКА** *ж* сәүкә ♦ **счита́ть га́лок** ауыҙ асып ҡалыу, асыҡ ауыҙ (мәшәү) булыу

**ГАЛЛИЦИ́ЗМ** *м* галлицизм (*француз теленән үҙләштерелгән һүҙ йәки һүҙбәйләнеш*)

**ГАЛЛО́Н** *м* галлон (*АҠШ-та, Англияла шыйыҡ һәм бөртөклө есемдәрҙе үлсәү берәмеге*)

**ГА́ЛЛЫ I** *мн.* (*ед.* **галл** *м*) галдар (*Франция территорияһында йәшәгән боронғо кельт ҡәбиләләре*)

**ГА́ЛЛЫ II** *мн.*; *бот.* оролар (*бактериялар, бөжәктәр һ.б. зарарлауы һөҙөмтәһендә үҫемлектәрҙә барлыҡҡа килә*)

**ГАЛЛЮЦИНА́ЦИЯ** *ж* галлюцинация (*баш мейеһе зарарланыуҙан һиҙеү ағзаларының яңылышыуы*)

**ГАЛЛЮЦИНИ́РОВАТЬ** *несов.* галлюцинация менән яфаланыу

**ГАЛОГЕ́НЫ** *мн.* (*ед.* **галоге́н** *м*) галогендар (*металдар менән химик реакцияла тоҙ барлыҡҡа килтерә торған фтор, йод, хлор, бром кеүек химик элементтарҙың дөйөм атамаһы*)

**ГАЛО́П** *м* **1.** һикертеп сабыу **2.** *муз.* галоп (*шәп темптағы бал бейеүе һәм шул бейеүгә музыка*); **игра́ть гало́п** галоп уйнау

**ГАЛОПИ́РОВАТЬ** *несов.* һикертеп сабыу; **конь галопи́рует** ат һикертеп саба

**ГАЛО́ПОМ** *нареч.* **1.** һикертеп сабып, һикертеп саптырып; **ло́шадь пусти́лась гало́пом** ат һикертеп саба башланы **2.** *перен.* бик тиҙ, саптырып; **собы́тия пошли́ гало́пом** ваҡиғалар бик тиҙ үтеп китте

**ГА́ЛОЧИЙ,** -ья, -ье сәүкә ...ы; **га́лочье гнездо́** сәүкә ояһы

**ГА́ЛОЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **га́лка** **2.** *разг.* билдә; **поста́вить га́лочку** билдә ҡуйыу

**ГАЛО́ШИ** *мн.* (*ед.* **гало́ша** *ж*) калуш; **надева́ть гало́ши** калуш кейеү

**ГА́ЛСТУК** *м* галстук; **завяза́ть га́лстук** галстук бәйләү; **носи́ть га́лстук** галстук тағып йөрөү

**ГАЛУ́Н** *м* уҡа, галун; **обшива́ть галуно́м** уҡа менән сигеү

**ГАЛУ́ШКИ** *мн.* (*ед.* **галу́шка** *ж*) галушка (*украин сумары*)

**ГАЛЧО́НОК** *м* сәүкә балаһы, бала сәүкә

**ГАЛЬВАНИЗА́ЦИЯ** *ж* гальванизация (*даими электр тоғының техникала йәки медицинала ҡулланылыуы*)

**ГАЛЬВАНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* гальванизациялау, гальванизация яһау (**1.** *ниҙер аша электр тоғы үткәреү* **2.** *электролиз ярҙамында ниҙе лә булһа металл менән ҡаплау*)

**ГАЛЬВАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** гальваник (*химик реакция менән ҡуҙғытыла торған, электр тоғын химик реакция юлы менән алыуға тәғәйенләнгән*); **гальвани́ческий ток** гальваник ток; **гальвани́ческие элеме́нты** гальваник элементтар **2.** гальванизация ...ы; **гальвани́ческие процеду́ры** гальванизация процедуралары

**ГАЛЬВАНО́МЕТР** *м*; *физ.* гальванометр (*көсө әҙ электр тоғын үлсәй торған прибор*)

**ГА́ЛЬКА** *ж* ҡырсынташ

**ГАМ** *м*; *разг.* шау-шыу, сыр-сыу; **слы́шится гам** сыр-сыу ишетелә

**ГАМАДРИ́Л** *м* гамадрил (*эре маймыл төрө*)

**ГАМА́К** *м* гамак (*ял итеү өсөн бауҙан үреп яһалған аҫмалы сәңгелдәк*); **кача́ться в гамаке́** гамакта бәүелеү

**ГАМА́ШИ** *мн.* (*ед.* **гама́ша** *ж*) гамаш; **шерстяны́е гама́ши** йөн гамаш; **наде́ть гама́ши** гамаш кейеү

**ГАМБИ́Т** *м*; *шахм.* гамбит; **фе́рзевый гамби́т** ферзь гамбиты

**ГА́ММА I** *ж*; гамма (**1.** *бер октава эсендә юғарыға йәки түбәнгә табан билдәле тәртип менән бер-бер артлы килгән тауыш теҙмәһе* **2.** *күсм. асылы бер булып та, нимә мənәндер айырылып торған күренештәр, сифаттар теҙеме*); **мажо́рная га́мма** мажорлы гамма; **га́мма кра́сок** буяуҙар гаммаһы; **игра́ть га́ммы** гаммалар уйнау

**ГА́ММА II** *ж* гамма (*грек алфавитындағы өсөнсө хәреф атамаһы*)

**ГА́ММА-ИЗЛУЧЕ́НИЕ** *с*; *физ.* гамма-нурланыш

**ГА́ММА-ЛУЧИ́** *мн.*; *физ.* гамма-нурҙар

**ГАНГРЕ́НА** *ж*; *мед.* гангрена (*тере туҡымаларҙың сереүе*) ♦ **га́зовая гангре́на** *см.* **га́зовый** I

**ГАНГРЕНО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое гангрена ...ы; **гангрено́зный проце́сс** гангрена процесы

**ГА́НГСТЕР** *м* гангстер (*бандиттар өйөрөндә ҡатнашыусы*)

**ГАНГСТЕРИ́ЗМ** *м* гангстерлыҡ, гангстеризм; **полити́ческий гангстери́зм** сәйәси гангстерлыҡ

**ГА́НГСТЕРСТВО** *с см.* **гангстери́зм**

**ГАНДБО́Л** *м* гандбол (*ҡул тубы уйыны*); **игра́ть в гандбо́л** гандбол уйнау

**ГАНДБОЛИ́СТ** *м* и **ГАНДБОЛИ́СТКА** *ж* гандболсы

**ГАНДБО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое гандбол ...ы; **гандбо́льный мяч** гандбол тубы

**ГАНТЕ́ЛЬ** *ж*; *спорт.* гантель (*гимнастик ҡорал*); **де́лать упражне́ния с ганте́лями** гантелдәр менән күнекмәләр яһау

**ГАОЛЯ́Н** *м* гаолян (*ҡытай тарыһы*)

**ГАРА́Ж** *м* гараж; **постро́ить гара́ж** гараж һалыу; **ста́вить маши́ну в гара́ж** машинаны гаражға ҡуйыу

**ГАРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое гараж ...ы; **гара́жные мастерски́е** гараж оҫтаханалары

**ГАРА́НТ** *м*; *юр.* гарант, гарантия биреүсе (*учреждение йәки кеше*)

**ГАРАНТИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** гарантия ...ы; **гаранти́йный срок** гарантия срогы **2.** гарантиялы; **гаранти́йное письмо́** гарантиялы хат; **гаранти́йный ремо́нт** гарантиялы ремонт

**ГАРАНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *что* гарантиялау, гарантия биреү; **гаранти́ровать ка́чество това́ра** тауарҙың сифатын гарантиялау **2.** (*защити́ть*) һаҡлау, тәьмин итеү; **гаранти́ровать от вся́ких неожи́данностей** һәр төрлө көтөлмәгән хәлдәрҙән һаҡлау

**ГАРАНТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **гаранти́ровать**

**ГАРА́НТИЯ** *ж* гарантия (*яуаплылыҡ йөкләмәһе*); **междунаро́дные гара́нтии** халыҡ-ара гарантиялар; **продава́ть с гара́нтией** гарантия менән һатыу

**ГАРДЕРО́Б** *м* гардероб (**1.** *кейем шкафы* **2.** *йәмәғәт йорттарында сисенеү урыны* **3.** *бер кешенең барлыҡ кейем-һалымы*); **пове́сить в гардеро́б** гардеробҡа элеү; **сдать пальто́ в гардеро́б** пальтоны гардеробҡа тапшырыу; **обнови́ть гардеро́б** гардероб яңыртыу

**ГАРДЕРО́БНАЯ** *ж см.* **гардеро́б** 2

**ГАРДЕРО́БЩИК** *м* и **ГАРДЕРО́БЩИЦА** *ж* гардеробсы

**ГАРДИ́НА** *ж* гардин; **тю́левая гарди́на** тюль гардины; **пове́сить гарди́ну** гардин элеү

**ГАРДИ́ННЫЙ,** -ая, -ое гардин, гардин ...ы; **гарди́нный тюль** гардин селтәр

**ГАРЕВО́Й** и **ГА́РЕВЫЙ,** -ая, -ое шлак һибелгән; **гарева́я доро́жка** шлак һибелгән юл

**ГАРЕ́М** *м* һәрәм; **содержа́ть гаре́м** һәрәм тотоу

**ГА́РКАТЬ** *несов.*; *прост.* екереү, аҡырыу

**ГА́РКНУТЬ** *сов.* екереп (аҡырып) ебәреү

**ГАРМОНИЗА́ЦИЯ** *ж*; *муз.* гармонизация, аһәңлелек

**ГАРМОНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *муз.* гармонизациялау, аһәңләштереү, яңырашын килешле итеү

**ГАРМОНИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **гармонизи́ровать**

**ГАРМОНИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **гармонизи́ровать**

**ГАРМОНИЗОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **гармонизова́ть**

**ГАРМО́НИКА** *ж* **1.** *муз.* гармун; **звук гармо́ники** гармун тауышы **2.** *в знач. нареч.* **гармо́никой**; **в гармо́нику** бөрмәләп; **сложи́ть лист бума́ги гармо́никой** ҡағыҙ битен бөрмәләп бөкләү ♦ **губна́я гармо́ника** ауыҙ гармуны

**ГАРМОНИ́РОВАТЬ** *несов. с чем* гармониялашыу, килешеп (тап килеп, ярашып) тороу; **его́ слова́ гармони́руют с посту́пками** уның һүҙҙәре эшләгән эштәре менән тап килә

**ГАРМОНИ́СТ** *м* гармунсы

**ГАРМОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *муз.* гармоник, гармонияға нигеҙләнгән, аһәңле; **гармони́ческие построе́ния** гармоник төҙөлөштәр **2.** *см.* **гармони́чный** **3.** *физ.* төҙөк, тәртипле, гармоник; **гармони́ческие колеба́ния** гармоник тирбәлеүҙәр

**ГАРМОНИ́ЧНОСТЬ** *ж* гармониялылыҡ, ярашҡанлыҡ, килешле булыу, аһәңдәшлек

**ГАРМОНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** гармониялы, аһәңле; **гармони́чный мино́р** гармониялы минор **2.** гармониялы; **гармони́чное разви́тие ли́чности** шәхестең гармониялы үҫеше

**ГАРМО́НИЯ** *ж* гармония, килешле бәйләнеш, тура килеп торған, аһәңлелек; **гармо́ния в приро́де** тәбиғәттәге гармония; **гармо́ния гла́сных** *лингв.* һуҙынҡылар гармонияһы

**ГАРМО́НЬ** *ж*; *разг. см.* **гармо́ника** 1

**ГАРМО́ШКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **гармо́ника** 1; **2.** *в знач. нареч.* **гармо́шкой**; **в гармо́шку** *см.* **гармо́ника** 2

**ГА́РНЕЦ** *м* гәрнис (**1.** *Рәсәйҙә метрик система индерелгәнгә тиклем ҡулланылған 3,28 л-ға тигеҙ бөртөклө нәмәне үлсәү берәмеге* **2.** *тирмән, сепаратор хужаһына түләнә торған өлөш*)

**ГАРНИЗО́Н** *м*; *воен.* гарнизон; **большо́й гарнизо́н** ҙур гарнизон

**ГАРНИЗО́ННЫЙ,** -ая, -ое гарнизон ...ы; **гарнизо́нная слу́жба** гарнизон хеҙмәте

**ГАРНИ́Р** *м* гарнир (*иттән, балыҡтан әҙерләнгән ашамлыҡ эргәһенә ҡушып һалына торған бутҡа, йәшелсә һ.б.*); **котле́ты с гарни́ром** гарнирлы котлет

**ГАРНИТУ́Р** *м* гарнитур (*бер төҫ, бер стилгә килтереп эшләнгән нәмәләр йыйымы*); **ме́бель-**



8 зак. 2.0084.05

**ный гарниту́р**; **гарниту́р ме́бели** мебель гарнитуры; **гарниту́р белья́** эске кейем гарнитуры

**ГАРПУ́Н** *м* гарпун (*эре диңгеҙ балыҡтарын һәм хайуандарын алыҫтан бәреп, сәнсеп ала торған баулы һөңгө*)

**ГАРПУНЁР** *м см.* **гарпу́нщик**

**ГАРПУ́НИТЬ** *несов. кого-что* гарпунлау

**ГАРПУ́ННЫЙ,** -ая, -ое гарпун ...ы; **гарпу́нная пу́шка** гарпун тубы

**ГАРПУ́НЩИК** *м* гарпунсы

**ГА́РУС** *м* гәрез (**1.** *сиратылған нәҙек йөн еп төрө* **2.** *йөнгә оҡшаған мамыҡ туҡыма төрө*); **вышива́ть га́русом** гәрез менән сигеү

**ГА́РУСНЫЙ,** -ая, -ое гәрез; **га́русный шарф** гәрез шарф

**ГАРЦЕВА́ТЬ** *несов.* атта оҫта йөрөү, ат уйнатыу

**ГАРЬ** *ж* **1.** көйөк, өтөк; **па́хнет га́рью** көйөк еҫе сыға **2.** (*нагар*) ҡором **3.** (*остатки от сгорания каменного угля*) шлак **4.** (*выжженное место*) үртән, көйөк

**ГАСИ́ТЬ** *несов. что* **1.** *прям., перен.* һүндереү; **гаси́ть свет** ут һүндереү; **гаси́ть задо́р** дәртте һүндереү **2.** *тех.* әҙәйтеү, йомшартыу, туҡтатыу; **гаси́ть колеба́ния** тирбәлеүҙәрҙе йомшартыу **3.** ғәмәлдән сығарыу; **гаси́ть почто́вую ма́рку** почта маркаһын ғәмәлдән сығарыу ♦ **гаси́ть и́звесть** эзбиз һүндереү (*һыулау*)

**ГА́СНУТЬ** *несов.*; *прям., перен.* һүнеү; **звёзды га́снут** йондоҙҙар һүнә; **наде́жды га́снут** өмөттәр һүнә; **ого́нь га́снет** ут һүнә

**ГАСТРИ́Т** *м*; *мед.* гастрит (*ашҡаҙан сире*); **при́знаки хрони́ческого гастри́та** хроник гастрит билдәләре

**ГАСТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* гастрит ...ы; **гастри́ческие явле́ния** гастрит күренештәре

**ГАСТРОЛЁР** *м* гастролёр (**1.** *гастролгә килгән артист* **2.** *күсм., һөйл. эштән эшкә күсеп йөрөгән кеше*)

**ГАСТРО́ЛИ** *мн.* (*ед.* **гастро́ль** *ж*) гастроль (*ситтән килеүсе артистарҙың сығышы*); **е́хать на гастро́ли** гастролгә китеү

**ГАСТРОЛИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** гастролгә йөрөү **2.** *перен., разг., неодобр.* (*часто менять место работы*) эштән-эшкә күсеп йөрөү

**ГАСТРО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое гастроль ...ы; **гастро́льный спекта́кль** гастроль спектакле; **гастро́льная тру́ппа** гастроль труппаһы

**ГАСТРОНО́М** *м* гастроном (*аҙыҡ-түлек магазины*)

**ГАСТРОНОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гастрономия ...ы; **гастрономи́ческий магази́н** гастрономия магазины

**ГАСТРОНО́МИЯ** *ж* гастрономия (*махсус рәүештә әҙерләнгән аҙыҡтарҙың дөйөм атамаһы*); **ры́бная гастроно́мия** балыҡ гастрономияһы

**ГАТИ́ТЬ** *несов. что* юл түшәү (*һаҙлыҡ аша үтеү өсөн*); **гати́ть боло́то** һаҙлыҡҡа юл түшәү

**ГАТЬ** *ж* түшәмә юл (*батҡаҡ урында бүрәнәнән, сыбыҡ-сабыҡтан һ.б.*)

**ГА́УБИЦА** *ж*; *воен.* гаубица (*артиллерия ҡоралы*)

**ГА́УБИЧНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* гаубица ...ы; **га́убичная батаре́я** гаубица батареяһы

**ГАУПТВА́ХТА** *ж*; *воен.* гауптвахта; **посади́ть на гауптва́хту** гауптвахтаға ултыртыу

**ГАШЁНЫЙ: гашёная и́звесть** һүндерелгән эзбиз; **гашёная ма́рка** ғәмәлдән сыҡҡан марка (*почта штампы йәки бүтән билдә ҡуйылған*)

**ГАШЕ́ТКА** *ж* гашетка (*пулемёттың тәтеһен ысҡындыра торған ырғаҡ*); **нажа́ть на гаше́тку** гашеткаға баҫыу

**ГАШИ́Ш** *м* хәшиш, нәшә

**ГВАЛТ** *м*; *разг.* ҡысҡырыш, шау-шыу, тауыш; **подня́ть гвалт** шау-шыу күтәреү

**ГВАРДЕ́ЕЦ** *м* гвардеец (*гвардияла хеҙмәт итеүсе һалдат*)

**ГВАРДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое гвардия ...ы; **гварде́йское зна́мя** гвардия байрағы

**ГВА́РДИЯ** *ж* гвардия (**1.** *ғәскәрҙең иң һәйбәт частары* **2.** *күсм. эш-көрәштә һыналған эшмәкәрҙәр*); **молода́я гва́рдия** йәш гвардия; **морска́я гва́рдия** диңгеҙ гвардияһы ♦ **Кра́сная гва́рдия** *ист.* Ҡыҙыл гвардия; **Бе́лая гва́рдия** *ист.* Аҡ гвардия

**ГВОЗДЁВКА** *ж*; *разг.* ҡаҙаҡлы тырма

**ГВОЗДЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** сөй, ҡаҙаҡ ...ы; **гвоздево́й заво́д** ҡаҙаҡ эшләү заводы **2.** *перен.* үҙәк, иң әһәмиәтле; **гвоздево́й но́мер програ́ммы** программаның иң әһәмиәтле номеры

**ГВОЗДИ́КА I** *ж* ҡәнәфер (*үҫемлек*)

**ГВОЗДИ́КА II** *ж собир.* ҡәнәфер (*асылмаған ҡәнәфер сәскәһен киптереп әҙерләгән тәмләткес*)

**ГВОЗДИ́ЧНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** ҡәнәфер ...ы; **гвозди́чная клу́мба** ҡәнәфер клумбаһы **2.** *в знач. сущ.* **гвозди́чные** *мн.*; *бот.* ҡәнәфер һымаҡтар ғаиләһе

**ГВОЗДИ́ЧНЫЙ II,** -ая, -ое ҡәнәфер ...ы; **гвозди́чное ма́сло** ҡәнәфер майы ♦ **гвозди́чное де́рево** ҡәнәфер ағасы (*тропик ағас*)

**ГВОЗДОДЁР** *м* ҡаҙаҡ (сөй) һурғыс

**ГВОЗДЬ** *м* **1.** сөй, ҡаҙаҡ; **деревя́нный гвоздь** ағас сөй; **вбить гвоздь** сөй ҡағыу; **ве́шать на гвоздь** ҡаҙаҡҡа элеү **2.** *чего*; *перен., разг.* үҙәк, нигеҙ, иң әһәмиәтле яҡ; **гвоздь програ́ммы** программаның үҙәге ♦ **гвоздём засе́сть (сиде́ть) в голове́ (в мозгу́)** баштан (уйҙан) сыҡмау; **(и) никаки́х гвозде́й** *прост.* әйткән-бөткән, бөттө-китте

**ГДЕ** *нареч.* **1.** ҡайҙа; **где ты живёшь?** һин ҡайҙа йәшәйһең?; **вот где они́** бына ҡайҙа улар **2.** *разг.* (*где-либо, где-нибудь*) *см.* **где́-либо, где́-нибудь**; **не вида́ли, где моя́ книга?** китабымды берәй ерҙә күрмәнегеҙме? **3.** *в знач. союзно-*

*го сл.* урында, ерҙә, -ған/-гән; **я был там, где никто́ не́ был** бер кем булмаған ерҙә мин булдым **4.** *в знач. частицы* ҡайҙа инде, ҡайҙа ул; **где им поня́ть!** ҡайҙа инде уларға аңлау!; **где стари-ку́ тяга́ться с молоды́м челове́ком!** ҡайҙа инде ҡартҡа йәш кеше менән ярышыу!

**ГДЕ́-ЛИБО** и **ГДЕ́-НИБУДЬ** *нареч.* ҡайҙа ла булһа, берәй ерҙә; **где́-нибудь встре́тимся** ҡайҙа ла булһа осрашырбыҙ

**ГДЕ́-ТО** *нареч.* ҡайҙалыр; **где́-то пла́чет ребёнок** ҡайҙалыр бала илай

**ГЕГЕЛЬЯ́НСТВО** *с*; *филос.* гегелселек (*Гегель фәлсәфәһе нигеҙендә тыуған идеалистик фәлсәфәүи ағым*)

**ГЕГЕМО́Н** *м*; *книжн.* гегемон, етәксе; **гегемо́н револю́ции** ихтилал гегемоны

**ГЕГЕМО́НИЯ** *ж*; *книжн.* гегемония; **гегемо́ния пролетариа́та** пролетариат гегемонияһы

**ГЕЕ́ННА** *ж*; *рел.* йәһәннәм, тамуҡ; **гее́нна о́гненная** утлы йәһәннәм

**ГЕЙ** *межд.*; *разг.* **1.** һәй, әй **2.** һайт; **гей, савра́сушка!** һайт, ҡолаҡай!

**ГЕ́ЙЗЕР** *м* гейзер, ғәйсәр (*вулкан ваҡыт-ваҡыт ҡайнар һыу һәм пар бәреп тора торған сығанаҡ*)

**ГЕ́ЙША** *ж* гейша (*Японияла ҡунаҡтарҙы ҡаршы алыу, күңелен асыу өсөн саҡырылған профессиональ бейеүсе һәм йырсы ҡатын-ҡыҙ; тәүҙәрәк сәйханаға килгәндәрҙең кәйефен күтәреүсе булған*)

**ГЕКАТО́МБА** *ж* гекатомба (*боронғо гректарҙа: йөҙ үгеҙҙән (йәки башҡа малдан) ҡорбан салыу; һәр төрлө ҙур ҡорбан салыу*)

**ГЕКЗА́МЕТР** *м*; *лит.* гекзаметр (*антик поэзияла алты быуынлы шиғыр төҙөлөшө*)

**ГЕКСАХЛОРА́Н** *м*; *хим.* гексахлоран (*короткостарға ҡаршы ҡулланылған ағыулы химикат*)

**ГЕКСА́ЭДР** *м*; *мат.* гексаэдр (*алты яҫылыҡ менән сикләнгән есем*)

**ГЕКТА́Р** *м* гектар

**ГЕКТО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "йөҙ", "йөҙ мәртәбә" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **гектогра́мм** гектограмм

**ГЕКТО́ГРАФ** *м* гектограф (*яҙыуҙы йәки һүрәтте күбәйтеп баҫа торған ябай ҡорамал*)

**ГЕКТОГРАФИ́РОВАТЬ** *несов. что* гектографта баҫыу

**ГЕКТОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гектограф ...ы; **гектографи́ческий спо́соб печа́тания** баҫыуҙың гектограф ысулы

**ГЕКТОЛИ́ТР** *м* гектолитр (*100 л-ға тигеҙ күләм үлсәү берәмеге*)

**ГЕКТОМЕ́ТР** *м* гектометр

**ГЕ́ЛИЙ** *м* гелий (*химик элемент, водородтан һуң килгән иң еңел инерт газ*)

**ГЕЛИО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡояш", "ҡояш нурҙары" мәғәнәһен белдергән беренсе өлөшө, мәҫ.,* **гелиоста́нция** ҡояш станцияһы

**ГЕЛИО́ГРАФ** *м* гелиограф (**1.** *астр. ҡояшты төшөрөп ала торған фотоаппаратлы телескоп* **2.** *метеор. көн эсендә ҡояштың яҡтыртҡан ваҡытын иҫәпләп яҙа торған автоматик прибор* **3.** *хәрб. йыраҡҡа яҡтылыҡ сигналы бирә торған прибор*)

**ГЕЛИОТЕРАПИ́Я** *ж*; *мед.* гелиотерапия (*ҡояш нуры менән дауалау*)

**ГЕЛИОТРО́П** *м* гелиотроп (**1.** *бот. хуш еҫле сәскәле декоратив үлән* **2.** *мин. ҡиммәтле минерал төрө*)

**ГЕЛИОЦЕНТРИ́ЧЕСКИЙ: гелиоцентри́ческая систе́ма ми́ра** ғаләмдең гелиоцентрик системаһы

**ГЕЛЬМИНТОЛО́ГИЯ** *ж* гельминтология (*паразит селәүсендәр һәм улар тараҡҡан ауырыуҙарҙы өйрәнә торған фән*)

**ГЕМАТОГЕ́Н** *м* гематоген (*һыйыр малының ҡанынан әҙерләнгән дауалау препараты*)

**ГЕМАТОЛО́ГИЯ** *ж* гематология (*ҡан составын һәм үҙенсәлеген, уның ауырыуҙарын дауалау ысулдарын өйрәнә торған фән*)

**ГЕМОГЛОБИ́Н** *м* гемоглобин (*ҡыҙыл ҡан бөртөксәләренең кислородты үҙенә һеңдереп, тәнгә тарата торған матдәһе*)

**ГЕМОРРОИДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое геморрой ...ы; **геморроида́льный у́зел** геморрой төйөнө

**ГЕМОРРО́Й** *м*; *мед.* геморрой (*тура эсәктең түбәнге осондағы ҡан тамырҙары киңәйеп, ҡанһыраған төйөндәр барлыҡҡа килтергән ауырыу*)

**ГЕМОРРО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое геморрой ...ы; **геморро́йная кровь** геморрой ҡаны

**ГЕМОФИЛИ́Я** *ж*; *мед.* гемофилия (*сирле кеше ҡанының насар ойошоуы йәки ҡан туҡтамау*)

**ГЕНЕАЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое генеалогия ...ы, генеалогик; **генеалоги́ческое родство́** генеалогик ҡәрҙәшлек; **генеалоги́ческая табли́ца** генеалогия таблицаһы

**ГЕНЕАЛО́ГИЯ** *ж* генеалогия, шәжәрә (**1.** *нәҫелдең бер-бер артлы килгән быуындары* **2.** *тарихтың нәҫел-ырыуҙар сығышын тикшергән бүлеге* **3.** *хайуан һәм үҫемлек ғаиләләренең сығышы*); **генеало́гия ро́да** ырыу генеалогияһы (шәжәрәһе)

**ГЕ́НЕЗИС** *м* генезис, барлыҡҡа килеү, килеп сығыу

**ГЕНЕРА́Л** *м* генерал (*юғары командалыҡ составында хәрби звание йәки дәрәжә*); **генера́л а́рмии** армия генералы; **генера́л-лейтена́нт** генерал-лейтенант; **генера́л-майо́р** генерал-майор; **генера́л-полко́вник** генерал-полковник

**ГЕНЕРА́Л-ГУБЕРНА́ТОР** *м* генерал-губернатор (*революцияға тиклем Рәсәйҙә һәм ҡайһы*

*бер илдәрҙә юғары хәрби һәм административ вазифа биләүсе*)

**ГЕНЕРАЛИ́ССИМУС** *м* генералиссимус (*ҡайһы бер илдәрҙә иң юғары хәрби дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше*)

**ГЕНЕРАЛИТЕ́Т** *м собир.* генералитет (*армияның юғары команда составы, генералдар*)

**ГЕНЕРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое генераль; **генера́льный план** генераль план; **генера́льный прокуро́р** генераль прокурор; **генера́льный секрета́рь** генераль секретарь ♦ **генера́льная ка́рта** генераль карта; **генера́льная репети́ция** генераль репетиция; **генера́льный штаб** генераль штаб

**ГЕНЕРА́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое генерал ...ы; **генера́льское зва́ние** генерал званиеһы; **генера́льские пого́ны** генерал погондары

**ГЕНЕРА́ЛЬША** *ж*; *разг.* генералдың ҡатыны

**ГЕНЕРА́ТОР** *м* **1.** *тех.* генератор; **генера́тор переме́нного то́ка** алмаш ток генераторы; **генера́тор колеба́ний** тирбәлеш генераторы **2.** *см.* **газогенера́тор**

**ГЕНЕРА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое генератор ...ы; **генера́торная устано́вка** генератор ҡоролмаһы ♦ **генера́торный газ** генератор газы

**ГЕНЕ́ТИК** *м* генетик, генетика белгесе; **рабо́тать гене́тиком** генетик булып эшләү

**ГЕНЕ́ТИКА** *ж* генетика (*нәҫел ҡанундары һәм организмдың үҙгәреүсәнлеген өйрәнә торған фән*); **разви́тие гене́тики** генетика үҫеше

**ГЕНЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** генетик; **генети́ческий ме́тод** генетик ысул; **генети́ческая связь** генетик бәйләнеш **2.** генетика ...ы; **генети́ческие пробле́мы** генетика проблемалары

**ГЕНИА́ЛЬНОСТЬ** *ж* гениаллек, даһилыҡ; **гениа́льность откры́тия** асыштың гениаллеге

**ГЕНИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** гениаль, бөйөк даһи; **гениа́льный поэ́т** бөйөк шағир **2.** гениаль; **гениа́льное произведе́ние** гениаль әҫәр

**ГЕ́НИЙ** *м* **1.** (*высшая степень одарённости*) даһилыҡ; **литерату́рный ге́ний Пу́шкина** Пушкиндың әҙәби даһилығы **2.** (*человек*) гений, даһи ♦ **до́брый ге́ний** *чей* изгелекле кеше, изге йән эйәһе; **злой ге́ний** *чей* хаслыҡлы кеше, яуыз зат

**ГЕНОЦИ́Д** *м* геноцид (*айырым бер халыҡ төркөмөн милләтенә, расаһына, диненә ҡарап юҡ итеү буйынса үткәрелгән фашистик сәйәсәт*)

**ГЕНШТА́Б** *м* (*генеральный штаб*) генштаб; **нача́льник геншта́ба** генштаб башлығы

**ГЕ́НЫ** *мн.* (*ед.* **ген** *м*); *биол.* ген, нәҫел (тоҡом) билдәләре

**ГЕО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "ер", "ергә бәйләнешле" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.*, **геофизика** геофизика

**ГЕОБОТА́НИКА** *ж* геоботаника (*үҫемлектәрҙең таралышын һәм үҙгәрешен географик факторҙарға, тупраҡ һәм климат үҙенсәлектәренә бәйләп өйрәнә торған фән*)

**ГЕО́ГРАФ** *м* географ, география белгесе

**ГЕОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** география ...ы; **географи́ческий а́тлас** география атласы; **географи́ческий факульте́т** география факультеты **2.** географик; **географи́ческое положе́ние страны́** илдең географик урыны ♦ **географи́ческая среда́** географик мөхит

**ГЕОГРА́ФИЯ** *ж* география; **физи́ческая геогра́фия** физик география; **геогра́фия почв** тупраҡ географияһы; **учи́тель геогра́фии** география уҡытыусыһы

**ГЕОДЕЗИ́СТ** *м* геодезист, геодезия белгесе; **па́ртия геодези́стов** геодезистар партияһы

**ГЕОДЕЗИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое геодезия ...ы; **геодези́ческие прибо́ры** геодезия приборҙары

**ГЕОДЕ́ЗИЯ** *ж* геодезия (*Ерҙең формаһын, үлсәмен өйрәнә торған фән*); **специали́ст по геоде́зии** геодезия белгесе

**ГЕО́ЛОГ** *м* геолог, геология белгесе

**ГЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** геология ...ы; **геологи́ческая ка́рта** геология картаһы; **геологи́ческая эпо́ха** геология дәүере **2.** геологик; **геологи́ческие изыска́ния** геологик тикшеренеүҙәр; **геологи́ческие проце́ссы** геологик процестар

**ГЕОЛО́ГИЯ** *ж* геология

**ГЕОЛОГОРАЗВЕ́ДКА** *ж* геологоразведка (*ҡаҙылмалар табыу маҡсатында алып барылған геологик эҙләнеүҙәр*)

**ГЕОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** геометрия ...ы; **геометри́ческая зада́ча** геометрия мәсьәләһе; **геометри́ческий ме́тод** геометрия алымы **2.** геометрик; **геометри́ческий орна́мент** геометрик орнамент

**ГЕОМЕ́ТРИЯ** *ж* геометрия; **аналити́ческая геоме́трия** аналитик геометрия; **элемента́рная геоме́трия** башланғыс геометрия

**ГЕОМОРФОЛО́ГИЯ** *ж* геоморфология (*физик географияның ер өҫтө төҙөлөшөн өйрәнә торған бүлеге*)

**ГЕОРГИ́Н** *м* и **ГЕОРГИ́НА** *ж* георгин; **бе́лый георги́н** аҡ георгин; **выра́щивать георги́ны** георгиндар үҫтереү

**ГЕОФИ́ЗИК** *м* геофизик, геофизика белгесе

**ГЕОФИ́ЗИКА** *м* геофизика (*Ерҙең физик үҙенсәлектәрен һәм ундағы физик процестарҙы өйрәнгән комплекслы фән*)

**ГЕОФИЗИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое геофизик, геофизика ...ы; **геофизи́ческие ме́тоды** геофизика ысулдары; **геофизи́ческая обсервато́рия** геофизика обсерваторияһы; **геофизи́ческие прибо́ры** геофизика приборҙары

**ГЕОХИ́МИК** *м* геохимик, геохимия белгесе

**ГЕОХИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое геохимик, геохимия ...ы; **геохими́ческие иссле́дования** геохимик тикшеренеүҙәр

**ГЕОХИ́МИЯ** *ж* геохимия (*Ерҙең химик составын һәм унда химик элементтар таралыу ҡанундарын өйрәнгән комплекслы фән*)

**ГЕПА́РД** *м* гепард (*бесәйҙәр ғаиләһенә ҡараған эре йыртҡыс хайуан*)

**ГЕПАТИ́Т** *м*; *мед.* гепатит (*бауыр шешеү*)

**ГЕРА́НЬ** *ж* яран (*үлән*); **гера́нь кровя́но-кра́сная** ҡыҙыл яран; **гера́нь лугова́я** туғай яраны

**ГЕРБ** *м* герб; **госуда́рственный герб** дәүләт гербы

**ГЕРБА́РИЙ** *м* гербарий; **собира́ть ли́стья для герба́рия** гербарийға япраҡ йыйыу

**ГЕРБИЦИ́ДЫ** *мн.* (*ед.* **гербици́д** *м*) гербицид (*ҡый үләндәренә ҡаршы ҡулланылған ағыу*); **применя́ть гербици́ды** гербицидтар ҡулланыу

**ГЕ́РБОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** герб ...ы; **ге́рбовый знак** герб тамғаһы **2.** герблы; **ге́рбовая печа́ть** герблы мисәт ♦ **ге́рбовая бума́га** герблы ҡағыҙ (*пошлина һаналып, акттарға һәм документтарға ҡулланылған ҡағыҙ*); **ге́рбовая ма́рка** герблы марка (*түләү билдәһе итеп документҡа йәбештерелгән марка*); **ге́рбовый сбор** герб йыйымы (*граждандарҙың, хоҡуҡи эштәрҙе рәсмиләштергәндә дәүләт гербы төшөрөлгән махсус ҡағыҙҙы йәки маркаларҙы файҙаланыу юлы менән алына торған махсус йыйым*)

**ГЕРКУЛЕ́С** *м* геркулес (**1.** *бик көслө кеше* **2.** *махсус әҙерләнгән һоло ярмаһы*)

**ГЕРКУЛЕ́СОВЫЙ,** -ая, -ое геркулес ...ы; **геркуле́совая ка́ша** геркулес бутҡаһы

**ГЕРМАНИ́ЗМ** *м* германизм (*немец теленән үҙләштерелгән һүҙ йәки һүҙбәйләнеш*)

**ГЕРМАНИ́СТИКА** *ж* германистика (*герман телдәрен һәм мәҙәниәтен өйрәнә торған фән*)

**ГЕРМА́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** герман ...ы; **герма́нские языки́** герман телдәре; **герма́нские племена́** герман ҡәбиләләре **2.** Германия ...ы; **герма́нское госуда́рство** Германия дәүләте

**ГЕРМА́НЦЫ** *мн.* германдар // *ед.* **герма́нец** *м* герман ир-аты; **герма́нка** *ж* герман ҡатын-ҡыҙы

**ГЕРМАФРОДИ́Т** *м* гермафродит, хөнәсә

**ГЕРМЕТИЗА́ЦИЯ** *ж* герметизация (*ниҙеңдер һыу, һауа үтмәҫлек итеп көпләнеүе*)

**ГЕРМЕТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* герметизациялау

**ГЕРМЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое герметик (*һыу, һауа үтмәҫлек итеп көпләнгән*); **гермети́ческий сосу́д** герметик һауыт; **гермети́ческий шлем** герметик шлем

**ГЕРОИ́ЗМ** *м* батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ; **трудово́й герои́зм** хеҙмәт батырлығы; **прояви́ть герои́зм** ҡаһарманлыҡ күрһәтеү

**ГЕРО́ИКА** *ж* героика (*героик эштәлек, героик кисерештәр*); **геро́ика револю́ции** революция героикаһы; **геро́ика труда́** хеҙмәт героикаһы

**ГЕРОИ́Н** *м* героин (*наркотик*)

**ГЕРОИ́НЯ** *ж* **1.** батыр ҡатын-ҡыҙ **2.** героиня (*төп персонаж*); **герои́ня по́вести** повестың героиняһы ♦ **мать-герои́ня** герой әсә

**ГЕРОИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое героик, геройҙарса, батырҙарса; **герои́ческий по́двиг** героик ҡаһарманлыҡ; **герои́ческие уси́лия** батырҙарса тырышлыҡ; **герои́ческий э́пос** героик эпос

**ГЕРО́Й** *м* **1.** батыр, ҡаһарман; **геро́й труда́** хеҙмәт батыры **2.** герой; **геро́й дня** көн геройы; **геро́й на́шего вре́мени** беҙҙең заман геройы **3.** герой, персонаж; **геро́й рома́на** романдың геройы ♦ **Геро́й Сове́тского Сою́за** *ист.* Советтар Союзы Геройы; **Геро́й Социалисти́ческого Труда́** *ист.* Социалистик Хеҙмәт Геройы; **го́род-геро́й** герой ҡала

**ГЕРО́ЙСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **герои́ческий**

**ГЕРО́ЙСТВО** *с* батырлыҡ, геройлыҡ, ҡаһарманлыҡ; **прояви́ть геро́йство** ҡаһарманлыҡ күрһәтеү

**ГЕРОНТОЛО́ГИЯ** *ж* геронтология (*ҡартайыу процесын һәм ғүмерҙе оҙайтыу сараларын өйрәнә торған фән*)

**ГЕРЦ** *м*; *физ.* герц (*тирбәлеш үлсәү берәмеге*)

**ГЕ́РЦОГ** *м* герцог (*Көнбайыш Европала аҡһөйәктәрҙең иң юғары титулы һәм шул исемде йөрөткән кеше*)

**ГЕРЦОГИ́НЯ** *ж* герцог ҡатыны, герцог ҡыҙы

**ГЕ́РЦОГСТВО** *с* герцоглыҡ (**1.** *башында герцог торған феодаль дәүләт* **2.** *герцог титулы*)

**ГЕСТА́ПО** *с нескл.* гестапо (*фашистик Германияның йәшерен полицияһы*)

**ГЕСТА́ПОВЕЦ** *м* гестапосы

**ГЕ́ТМАН** *м*; *ист.* гетман (**1.** *XVI—XVIII бб. Польшала һәм Литвала ҡоралды көстәрҙең баш командующийы* **2.** *XVI—XVII бб. Украинала казак ғәскәренең һайлап ҡуйылған башлығы*; *XVII—XVIII бб. Украина хакимы*)

**ГЕ́ТРЫ** *мн.* (*ед.* **ге́тра** *ж*) гетр (*йылы ҡуныс*)

**ГЕ́ТТО** *с нескл.* гетто (*ҙур ҡалаларҙа дискриминацияланған раса вәкилдәре йәки дин тотоусылар йәшәгән район*); **негритя́нское ге́тто** негрҙар геттоһы

**ГИАЦИ́НТ** *м* **1.** *бот.* сөмбөл (*гөл*) **2.** *мин.* гиацинт (*аҫыл таш төрө*)

**ГИББО́Н** *м* гиббон (*кешегә оҡшаш маймыл*)

**ГИ́БЕЛЬ** *ж* **1.** һәләкәт, үлем; **траги́ческая ги́бель** фажиғәле үлем; **ги́бель корабля́** караптың һәләкәте; **обре́чь на ги́бель** *кого-что* фажиғәле үлемгә дусар итеү **2.** *в знач. сказ.*; *прост.* (*множество*) тулып ята, һәләк күп, иҫәбе-хисабы юҡ; **комаро́в там ги́бель** унда серәкәйҙең иҫәбе-хисабы юҡ ♦ **быть (находи́ться) на краю́ ги́бели** үлем сигендә тороу

**ГИ́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һәләкәтле, һәләкәткә килтерә торған; **ги́бельные после́дствия** һәләкәтле эҙемтәләр; **ги́бельный шаг** һәләкәтле аҙым

**ГИ́БКИЙ,** -ая, -ое **1.** һығылмалы, бөгөлөүсән, һығылып-бөгөлөп торған, һыйғыр; **ги́бкий прут** һыйғыр сыбыҡ; **ги́бкий стан** һығылып-бөгөлөп

торған кәүҙә **2.** *перен.* зирәк, һығылмалы; **ги́бкая поли́тика** һығылмалы сәйәсәт; **ги́бкий ум** зирәк аҡыл

**ГИ́БКОСТЬ** *ж* **1.** һығылмалылыҡ, бөгөлөүсәнлек, һыйғырлыҡ; **ги́бкость те́ла** кәүҙәнең һығылмалылығы **2.** *перен.* зирәклек, һығылмалылыҡ; **прояви́ть ги́бкость** һығылмалылыҡ күрһәтеү

**ГИ́БЛЫЙ,** -ая, -ое *прост.* баш бөтөрлөк, һәләкәтле; **ги́блое ме́сто** баш бөтөрлөк урын ♦ **ги́блое де́ло** өмөтһөҙ эш

**ГИ́БНУТЬ** *несов.* һәләк булыу, ҡырылыу, үлеү; **зимо́й мно́го птиц ги́бнет** ҡышын бик күп ҡош ҡырыла

**ГИБРИ́Д** *м* гибрид; **гибри́д ви́шни и чере́шни** сейә менән черешня гибриды

**ГИБРИДИЗА́ЦИЯ** *ж* гибридлаштырыу; **ме́тод гибридиза́ции** гибридлаштырыу ысулы

**ГИБРИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое гибрид; **гибри́дные семена́** гибрид орлоҡтар

**ГИГА́НТ** *м*; *прям.*, *перен.* гигант; **заво́д-гига́нт** гигант завод; **гига́нт нау́ки** фән гиганты

**ГИГА́НТСКИЙ,** -ая, -ое гигант, ғәйәт (ифрат) ҙур; **гига́нтский стано́к** гигант станок ♦ **гига́нтскими шага́ми идти́ (дви́гаться) вперёд** бик тиҙ үҫеү, ниндәйҙер уңышҡа тиҙ өлгәшеү

**ГИГИЕ́НА** *ж* гигиена; **ли́чная гигие́на** шәхси гигиена; **гигие́на труда́** хеҙмәт гигиенаһы; **пра́вила гигие́ны** гигиена ҡағиҙәләре

**ГИГИЕНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое (*основанный на гигиене*) гигиена ...ы; **гигиени́ческая гимна́стика** гигиена гимнастикаһы; **гигиени́ческие ме́ры** гигиена саралары

**ГИГИЕНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (*удовлетворяющий правилам гигиены*) гигиеналы, гигиенаға ярашлы; **гигиени́чный костю́м** гигиенаға ярашлы костюм; **гигиени́чные жили́щные усло́вия** гигиеналы торлаҡ шарттары

**ГИГРОСКОПИ́ЧЕСКИЙ** и **ГИГРОСКОПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое гигроскопик (*дымды еңел һеңдерә торған*); **гигроскопи́ческая ва́та** гигроскопик мамыҡ

**ГИД** *м* гид (*экскурсияла аңлатып йөрөгән кеше*)

**ГИ́ДРА** *ж* **1.** *миф.* гидра, аждаһа (*киҫкән башы яңынан үҫеп сығып торған күп башлы йылан*) **2.** *зоол.* гидра (*ауыҙ тирәһе һәрмәүес менән уратылған умыртҡаһыҙ сөсө һыу йәнлеге — полип*)

**ГИДРА́ВЛИКА** *ж* гидравлика (*һыуҙың тигеҙлек һаҡлау, унда хәрәкәт итеү ҡанундары һәм уларҙы ҡулланыу тураһындағы фән*)

**ГИДРАВЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** гидравлика ...ы; **гидравли́ческое иссле́дование** гидравлика тикшеренеүе **2.** гидравлик; **гидравли́ческий дви́гатель** гидравлик двигатель

**ГИДРА́Т** *м*; *хим.* гидрат; **гидра́т о́киси желе́за** тимер окисы гидраты

**ГИДРИ́Д** *м*; *хим.* гидрид

**ГИДРО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "һыу", "һыу менән бәйләнешле" мәғәнәһен белдергән беренсе өлөшө, мәҫ.*, **гидроавиа́ция** һыу авиацияһы; **гидроизоля́ция** һыу изоляцияһы

**ГИДРОАКУ́СТИКА** *ж* гидроакустика (*акустиканың һыуҙа тауыш таралыуын өйрәнгән бүлеге*)

**ГИДРОАКУСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гидроакустика ...ы; **гидроакусти́ческая аппарату́ра** гидроакустика аппаратураһы; **гидроакусти́ческая слу́жба** гидроакустика хеҙмәте

**ГИДРОБИОЛО́ГИЯ** *ж* гидробиология (*һыуҙағы организмдарҙы өйрәнә торған фән*)

**ГИДРОГЕОЛО́ГИЯ** *ж* гидрогеология (*ер аҫты һыуҙарының килеп сығышын һ.б. өйрәнә торған фән*)

**ГИДРОМЕТЕОРОЛО́ГИЯ** *ж* гидрометеорология (*атмосфералағы һыу әйләнешен өйрәнә торған фән*)

**ГИДРОПО́НИКА** *ж* гидропоника (*үҫемлекте ашламалы, туҡлыҡлы иретмәлә тупраҡһыҙ үҫтереү ысулы*)

**ГИДРОПУ́ЛЬТ** *м* гидропульт, һыу һиптергес

**ГИДРОСАМОЛЁТ** *м* гидросамолёт (*һыу өҫтөнән һауаға күтәрелә һәм ултыра алған самолёт*)

**ГИДРОСТА́НЦИЯ** *ж* гидростанция; **постро́ить гидроста́нцию** гидростанция төҙөү

**ГИДРОСФЕ́РА** *ж* гидросфера (*ер өҫтөндәге барлыҡ һыу ҡатламы*)

**ГИДРОТЕ́ХНИК** *м* гидротехник, гидротехника белгесе

**ГИДРОТЕ́ХНИКА** *ж* гидротехника (*тәбиғәттәге һыу байлығын, уны төрлө ҡоролма ярҙамында хужалыҡта ҡулланыу, һыу баҫыуҙан һаҡланыу юлдарын өйрәнә торған фән һәм техника тармағы*)

**ГИДРОТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гидротехника ...ы, гидротехник; **гидротехни́ческие рабо́ты** гидротехника эштәре; **гидротехни́ческое сооруже́ние** гидротехник ҡоролма

**ГИДРОТУРБИ́НА** *ж* гидротурбина, һыу турбинаһы

**ГИДРОУ́ЗЕЛ** *м* гидроузел (*станция, канал, шлюз һ.б.ш. барлыҡ гидротехника ҡоролмалары*)

**ГИДРОФО́Н** *м* гидрофон (*һыуҙағы тауыш тулҡындарын тотоу приборы*)

**ГИДРОХИ́МИЯ** *ж* гидрохимия (*гидросферолағы һыуҙың химик составы һәм уны өйрәнеү юлдары тураһындағы фән*)

**ГИДРОЭНЕРГЕ́ТИКА** *ж* гидроэнергетика (*һыу энергияһын файҙаланыу тураһындағы фән тармағы*)

**ГИДРОЭНЕРГЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гидроэнергетика ...ы, гидроэнергетик; **гидроэнергети́ческий ко́мплекс** гидроэнергетика комплексы;

**гидроэнергети́ческие ресу́рсы** гидроэнергетика ресурстары

**ГИЕ́НА** *ж* һыртлан

**ГИ́КАНЬЕ** *с см.* **ги́кать**

**ГИ́КАТЬ** *несов.*; *разг.* ҡыйҡыулау, һайтлау, һайтылдау

**ГИ́КНУТЬ** *сов.* һайтлатып ебәреү

**ГИ́ЛЬДИЯ** *ж*; *ист.* гильдия (**1.** *урта быуаттарҙа Көнбайыш Европала сауҙагәрҙәр һәм һөнәрселәр берлеге* **2.** *революцияға тиклем Рәсәйҙә сауҙагәрҙәрҙе байлығына ҡарап бүлә торған дәрәжә*)

**ГИ́ЛЬЗА** *ж* гильза (**1.** *атыу ҡоралында ябыҡ яғына дары һалынған, икенсе асыҡ яғы пуля йәки снаряд ҡуйыу өсөн ҡулайлаштырылған көпсәк* **2.** *папиростың тәмәке тултырылған өлөшө*)

**ГИЛЬОТИ́НА** *ж* гильотина (*үлем язаһын тормошҡа ашырыуға тәғәйенләнгән баш ҡырҡа торған ҡорал*)

**ГИЛЬОТИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого* гильотинала язалау

**ГИМН** *м* **1.** гимн (*дәүләт йәки социаль төркөм берҙәмлегенең символы булған тантаналы йыр йәки көй*); **Госуда́рственный гимн Респу́блики Башкортоста́н** Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны **2.** дан (данлау, маҡтау) йыры; **гимн геро́йству** ҡаһарманлыҡҡа гимн; **гимн труду́** хеҙмәткә дан йыры

**ГИМНАЗИ́СТ** *м* и **ГИМНАЗИ́СТКА** *ж* гимназист, гимназияла уҡыусы

**ГИМНАЗИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гимназия …ы, гимназист …ы; **гимнази́ческая фо́рма** гимназист формаһы

**ГИМНА́ЗИЯ** *ж* гимназия (**1.** *ҡайһы бер илдәрҙә дөйөм белем биреү учреждениеһы* **2.** *хәҙерге Рәсәйҙә ҡайһы бер фәндәрҙе тәрән өйрәнеүгә нигеҙләнгән урта белем биреү учреждениеһы*); **же́нская гимна́зия** ҡыҙҙар гимназияһы

**ГИМНА́СТ** *м* и **ГИМНА́СТКА** *ж*; *спорт.* гимнаст; **соревнова́ние гимна́стов** гимнастар ярышы

**ГИМНАСТЁРКА** *ж* гимнастёрка; **надева́ть гимнастёрку** гимнастёрка кейеү

**ГИМНА́СТИКА** *ж* гимнастика; **у́тренняя гимна́стика** иртәнге гимнастика; **занима́ться гимна́стикой** гимнастика менән шөғөлләнеү

**ГИМНАСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гимнастика …ы; **гимнасти́ческий зал** гимнастика залы

**ГИНЕКО́ЛОГ** *м* гинеколог (*табип*)

**ГИНЕКОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гинекология …ы, гинекологик; **гинекологи́ческая кли́ника** гинекология клиникаһы; **гинекологи́ческая опера́ция** гинекологик операция

**ГИНЕКОЛО́ГИЯ** *ж* гинекология (*ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙары һәм уларҙы дауалау ысулдарын өйрәнә торған фән*)

**ГИПЕ́РБОЛА I** *ж*; *лит.* гипербола (*арттырып, көсәйтеп һүрәтләү алымы*)

**ГИПЕ́РБОЛА II** *ж*; *мат.* гипербола (*ҡыҫынҡы янға йәки дуғаға оҡшаған кәкре һыҙыҡ*)

**ГИПЕРБОЛИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое *лит.* гиперболалы; **гиперболи́ческое сравне́ние** гиперболалы сағыштырыу; **гиперболи́ческий стиль** гиперболалы стиль

**ГИПЕРБОЛИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое *мат.* гипербола …ы; **гиперболи́ческое сече́ние** гипербола киҫеме

**ГИПЕРТО́НИК** *м*; *разг.* гипертоник (*гипертония менән ауырыған кеше*)

**ГИПЕРТОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гипертония …ы; **гипертони́ческая боле́знь** гипертония ауырыуы

**ГИПЕРТОНИ́Я** *ж*; *мед.* гипертония (*ҡан баҫымының күтәрелеүе*)

**ГИПЕРТРОФИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое гипертрофияланған; **гипертрофи́рованные мы́шцы** гипертрофияланған мускулдар

**ГИПЕРТРОФИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов.* гипертрофияланыу

**ГИПЕРТРОФИ́Я** *ж* гипертрофия (*сир йәки ауыр эш һөҙөмтәһендә берәй ағзаның ҙурайып үҫеп китеүе*); **гипертрофи́я се́рдца** йөрәк гипертрофияһы

**ГИПНО́З** *м* гипноз; **лечи́ть гипно́зом** гипноз менән дауалау; **быть в состоя́нии гипно́за** гипноз хәлендә булыу; **сеа́нс гипно́за** гипноз сеансы

**ГИПНОТИЗЁР** *м* гипнотизёр, гипнозсы

**ГИПНОТИЗИ́РОВАТЬ** *несов. кого*; *прям., перен.* гипнозлау, гипноз яһау

**ГИПНОТИ́ЗМ** *м* гипнотизм (**1.** *гипноз тураһындағы тәғлимәт* **2.** *тәьҫир итеү һәләте*)

**ГИПНОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гипноз …ы, гипнотизм …ы; **гипноти́ческий сон** гипноз йоҡоһо; **гипноти́ческие явле́ния** гипнотизм күренештәре

**ГИПО́ТЕЗА** *ж* гипотеза (*ғилми фараз*)

**ГИПОТЕНУ́ЗА** *ж*; *мат.* гипотенуза (*өсмөйөштөң тура мөйөшкә ҡаршы яғы*)

**ГИПОТЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* гипотезаға нигеҙләнгән, фараз ителгән; **гипотети́ческое сужде́ние** гипотезаға нигеҙләнеп фекер йөрөтөү

**ГИПОТЕТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **гипотети́ческий**

**ГИПОТО́НИК** *м*; *разг.* гипотоник

**ГИПОТОНИ́Я** *ж*; *мед.* гипотония (*ҡан баҫымының түбәнәйеүе*)

**ГИПО́ФИЗ** и **ГИПОФИ́З** *м*; *анат.* гипофиз (*баш мейеһенең төбөндә урынлашҡан, организмдың үҫешенә тәьҫир итә торған эске секреция биҙе*)

**ГИППОПОТА́М** *м см.* **бегемо́т**

**ГИПС** *м* гипс; **наложи́ть гипс на́ руку** ҡулға гипс һалыу; **ста́туя из ги́пса** гипс статуя

**ГИПСОВА́НИЕ** *с см.* **гипсова́ть**; **те́хника гипсова́ния позвоно́чника** умыртҡалыҡты гипслау техникаһы

**ГИПСОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** *мед.* гипслау; **гипсова́ть ру́ку** ҡулды гипслау **2.** *с.-х.* гипслау, гипсҡа байыҡтырыу; **гипсова́ть по́чву** тупраҡты гипслау

**ГИ́ПСОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** гипс ...ы; **ги́псовые за́лежи** гипс ятҡылыҡтары; **ги́псовый раство́р** гипс иҙмәһе **2.** гипс; **ги́псовая повя́зка** гипс бәй; **ги́псовая ста́туя** гипс һын

**ГИПЮ́Р** *м* гипюр (*күпертеп бәйләнгән селтәр төрө*)

**ГИПЮ́РОВЫЙ,** -ая, -ое гипюр; **гипю́ровый воротни́к** гипюр яға

**ГИРЕВИ́К** *м*; *спорт.* гер күтәреүсе

**ГИРЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** гер ...ы; **гирево́й спорт** гер спорты **2.** герле, гер менән; **гиревы́е упражне́ния** гер менән күнекмәләр

**ГИРЛЯ́НДА** *ж* гирлянда, үрем; **гирля́нда цвето́в** сәскәләр үреме

**ГИ́РЯ** *ж* гер; **двухкилограммо́вая ги́ря** ике килограмлы гер; **поднима́ть ги́ри** гер күтәреү; **стенны́е часы́ с ги́рями** герле стена сәғәте

**ГИСТО́ЛОГ** *м* гистолог, гистология белгесе

**ГИСТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** гистология ...ы, гистологик; **гистологи́ческие иссле́дования** гистологик тикшеренеүҙәр; **гистологи́ческое строе́ние** гистологик төҙөлөш

**ГИСТОЛО́ГИЯ** *ж* гистология (*кешенең һәм хайуандарҙың туҡымаларын өйрәнә торған фән*)

**ГИТА́РА** *ж* гитара; **семистру́нная гита́ра** ете ҡыллы гитара

**ГИТАРИ́СТ** *м* и **ГИТАРИ́СТКА** *ж* гитарасы, гитарала уйнаусы

**ГИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое гитара ...ы; **гита́рные стру́ны** гитара ҡылдары

**ГИ́ЧКА** *ж* ҡайыҡ (*кәмә төрө*)

**ГЛАВА́ I** *ж* **1.** *уст.*, *высок. см.* **голова́** 1; **2.** (*купол*) көмбәҙ; **глава́ хра́ма** храм көмбәҙе **3. глава́** *м* и *ж* башлыҡ, эйә; **глава́ семьи́** ғаилә башлығы; **глава́ прави́тельства** хөкүмәт башлығы ♦ **(идти́) во главе́** башында (барыу); **(быть, стоя́ть) во главе́** етәкселегендә; **ста́вить во главу́ угла́** иң төп мәсьәлә итеп һанау

**ГЛАВА́ II** *ж* бүлек; **пе́рвая глава́ кни́ги** китаптың беренсе бүлеге

**ГЛАВА́РЬ** *м* башлыҡ; **глава́рь мятежа́** фетнә башлығы

**ГЛАВЕ́НСТВО** *с* өҫтөнлөк; **главе́нство зако́нов респу́блики** республика закондарының өҫтөнлөгө

**ГЛАВЕ́НСТВОВАТЬ** *несов.* өҫтөнлөк итеү, өҫтөн (баш) булыу, етәкселек итеү; **главе́нствовать в семье́** ғаиләлә баш булыу

**ГЛАВК** *м* (*главный комитет*) главк (*министрлыҡ, ведомство бүлектәренең, ҙур учреждениеларҙың һ.б. баш идаралыҡтары исеме*)

**ГЛАВНОКОМА́НДУЮЩИЙ** *м* баш командующий

**ГЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төп, иң мөһим; **гла́вная зада́ча** төп бурыс; **гла́вная роль** төп роль **2.** баш, өлкән; **гла́вный врач** баш табип; **гла́вный инжене́р** баш инженер **3.** *в знач. вводн. сл.* **гла́вное** *разг.* иң мөһиме, бөтәһенән бигерәк ♦ **гла́вное предложе́ние** *грам.* баш һөйләм; **гла́вные чле́ны предложе́ния** *грам.* һөйләмдең баш киҫәктәре; **гла́вным о́бразом** башлыса

**ГЛАГО́Л** *м*; *грам.* ҡылым; **вспомога́тельный глаго́л** ярҙамсы ҡылым; **времена́ глаго́ла** ҡылым замандары

**ГЛАГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* ҡылым ...ы; **глаго́льная фо́рма** ҡылым формаһы; **глаго́льные ви́ды** ҡылым төрҙәре

**ГЛАДИА́ТОР** *м*; *ист.* гладиатор (*Боронғо Римда батырҙар йәки йыртҡыс хайуандар менән алышыусы*); **бой гладиа́торов** гладиаторҙар һуғышы

**ГЛАДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үтекләү ...ы; **глади́льная доска́** үтекләү таҡтаһы

**ГЛАДИО́ЛУС** *м* гладиолус (*баҡса сәскәһе*)

**ГЛА́ДИТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* үтекләү **2.** *кого-что* һыйпау; **гла́дить во́лосы** сәсте һыйпау ♦ **гла́дить по голо́вке** *кого* юл ҡуйыу, ыңғайына тороу; **гла́дить про́тив ше́рсти** ҡаршы төшөү

**ГЛА́ДКИЙ,** -ая, -ое **1.** шыма, тигеҙ; **гла́дкая доска́** шыма таҡта **2.** (*о волосах*) шыма ятып торған; **гла́дкие чёрные во́лосы** шыма ҡара сәс **3.** *перен.* шыма, оҫта; **гла́дкая речь** шыма телмәр **4.** *прост.* (*упитанный*) көр, һимеҙ ♦ **взя́тки гла́дки** *см.* **взя́тка**

**ГЛА́ДКО** *нареч.* **1.** тигеҙ, шыма; **гла́дко вы́строгать до́ску** таҡтаны шыма итеп йышыу **2.** шыма; **гла́дко причеса́ть во́лосы** сәсте шыма тарау **3.** *перен.* шыма, оҫта; **говори́ть гла́дко** шыма һөйләү; **спекта́кль прошёл гла́дко** спектакль шыма үтте

**ГЛАДКОСТВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое шыма көбәкле; **гладкоство́льное ружьё** шыма көбәкле мылтыҡ

**ГЛАДЬ I** *ж* тигеҙлек; **необозри́мая гладь** күҙ күреме етмәҫлек тигеҙлек ♦ **тишь да гладь** бик тыныс тормош

**ГЛАДЬ II** *ж* (*вышивка*) шыма (сигеү) нағыш; **вышива́ть гла́дью** шыма нағыш һалыу, шыма нағышлау

**ГЛА́ЖЕНЬЕ** *с см.* **гла́дить** 1; **гла́женье белья́** кер үтекләү

**ГЛАЗ** *м* **1.** күҙ; **чёрные глаза́** ҡара күҙҙәр; **пра́вый глаз** уң күҙ; **близору́кие глаза́** күрәш күҙҙәр; **зажму́рить глаза́** күҙ ҡыҫыу; **прищу́рить глаза́** күҙ секрәйтеү; **оки́нуть глаза́ми** күҙ ташлау; **лиши́ться глаз** күҙҙән яҙыу; **сомкну́ть глаза́** күҙҙе йомоу **2.** *перен.*, *разг.* (*присмотр, надзор*)

күҙ-ҡолаҡ булыу, ҡарау, бағыу; **хозя́йский глаз** хужаларса ҡарау; **за ни́ми ну́жен глаз да глаз** уларға гел күҙ-ҡолаҡ булып тороу кәрәк ♦ **броса́ться (кида́ться) в глаза́** күҙгә ташланыу; **в глаза́ (говори́ть, брани́ть и т.п.)** бәреп әйтеү (әрләү һ.б.); **в глаза́ не вида́ть** *кого-чего* күргән булмау; **в глаза́х** *чьих* күҙ алдында; **за глаза́**: 1) (*говорить, ругать и т.д.*) арттан әйтеү (әрләү һ.б.); 2) (*хватит, достаточно и т.п.*) артығы менән, күҙҙәй итеп; **из глаз (скры́ться, исче́знуть, пропа́сть и т.п.)** күҙҙән юғалыу (йәшенеү, юҡ булыу һ.б.); **на глаз (определя́ть, прики́дывать и т.п.)** сама менән, күҙәмәгә (билдәләү, ҡарау һ.б.); **на глаза́х** *чьих, у кого* күҙ алдында; **дурно́й глаз** ҡаты күҙ; **глаза́ бы (мои́) не вида́ли** *кого-чего* күрге лә килмәй; **глаза́ горя́т (разгоре́лись)** *у кого, на что* күҙ ҡыҙа (йылтырай); **глаза́ на лоб ле́зут** *прост.* күҙе маңлайына менгән; **глаза́ на мо́кром ме́сте** *у кого* илап бара; **откры́ть (раскры́ть) глаза́** *кому, на кого-что* күҙен асыу; **прогляде́ть (просмотре́ть) все глаза́** дүрт күҙ менән көтөү; **закры́ть глаза́** *на что* күҙ йомоп ҡалыу; **не каза́ть (не пока́зывать) глаз** күҙгә-башҡа күренмәү; **не своди́ть глаз** *с кого-чего* күҙҙе алмай ҡарау; **ско́лько хвата́ет глаз** күҙ күреме ер; **смотре́ть (гляде́ть) други́ми (ины́ми) глаза́ми** *на кого-что* икенсе күҙлектән ҡарау; **смотре́ть (гляде́ть) в о́ба гла́за** уяу (һаҡ) булыу; **смотре́ть (гляде́ть) сме́рти (опа́сности, ги́бели и т.п.) в глаза́** үлемдең күҙенә ҡарау, үлем сигендә булыу; **смотре́ть (гляде́ть) пря́мо (сме́ло) в глаза́** *чему* тура ҡарау, һис ҡурҡмау; **стоя́ть (встава́ть и т.п.) пе́ред глаза́ми**; **стоя́ть в глаза́х** күҙ алдында тороу; **куда́ глаза́ глядя́т (идти́, брести́, бежа́ть и т.п.)** баш һуҡҡан яҡҡа (китеү, юл алыу, йүгереү һ.б.); ҡайҙа етте, шунда китеү; **куда́ ни кинь гла́зом** бөтә ерҙә, ҡайҙа ҡарама; **на глаза́ не пока́зываться** *кому* күҙенә күренмәү; **на глаза́ попа́сть (попа́сться)** *кому* күҙенә эленеү (эләгеү); **наско́лько хвата́ет глаз**; **куда́ достаёт глаз** күҙ күрә алған тиклем; **ни в одно́м глазу́** күҙенә лә сыҡмаған (айныҡ); **с глаз доло́й** күҙемдән юғал; **с гла́зу на́ глаз** күҙгә-күҙ, икәүҙән-икәү генә; **(темно́,) хоть глаз коли́ (вы́коли)** *см.* **коло́ть**

**ГЛАЗА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ҙур (шар) күҙле, аҡай күҙле **2.** (*зоркий*) осло (үткер) күҙле

**ГЛАЗЕ́Т** *м* уҡалы ҡытат

**ГЛАЗЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* ҡарап тороу, ауыҙ асып ҡарап тороу; **глазе́ть по сторона́м** тирә-яҡҡа ҡарап тороу

**ГЛАЗИРОВА́НИЕ** *с см.* **глазирова́ть**

**ГЛАЗИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **глазирова́ть 2.** *прил.* глазурлы, глазурланған, шәрбәткә ҡатырылған **3.** *прил.* (*глянцевый*) ялтырауыҡлы, ялтыратылған; **глазиро́ванная бума́га** ялтыратылған ҡағыҙ

**ГЛАЗИРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* **1.** глазурлау, глазурь менән ҡаплау; **глазирова́ть фру́кты** емештәрҙе глазурь менән ҡаплау **2.** (*придать глянец*) ялтыратыу

**ГЛАЗНИ́К** *м*; *разг.* күҙ табибы

**ГЛАЗНИ́ЦА** *ж*; *анат.* күҙ соҡоро

**ГЛАЗНО́Й,** -ая, -ое күҙ ...ы; **глазно́е я́блоко** күҙ алмаһы; **глазны́е ка́пли** күҙ дарыуы

**ГЛАЗО́К** *м* **1.** *мн.* **гла́зки**; *уменьш.-ласк. от* **глаз** 1; **2.** *мн.* **глазки́**; *бот.* күҙ, бөрө **3.** *мн.* **глазки́** (*отверстия*) күҙ, тишек **4.** *мн.* **глазки́** (*в окраске насекомых, птиц и т.д.*) һипкел, төрткө ♦ **на глазо́к (определя́ть, прики́дывать и т.п.)** күҙ менән самалап (билдәләү, ҡарау һ.б.); **стро́ить гла́зки** күҙ уйнатыу, ҡаш һикертеү

**ГЛАЗОМЕ́Р** *м* күҙәмә, күҙ үлсәме ♦ **на глазоме́р** күҙ үлсәме менән

**ГЛАЗОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое күҙ үлсәме менән; **глазоме́рное определе́ние расстоя́ний** араларҙы күҙ үлсәме менән билдәләү ♦ **глазоме́рная съёмка** күҙ үлсәме менән төшөрөү (*рәсемгә*)

**ГЛАЗУ́НЬЯ** *ж* йомортҡа тәбейәһе

**ГЛАЗУРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **глазурова́ть 2.** *прил.* глазурлы, ялтырауыҡлы; **глазуро́ванный кирпи́ч** ялтырауыҡлы кирбес

**ГЛАЗУРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* ялтырауыҡлау, глазурлау, ялтырауыҡ йүгертеү; **глазурова́ть посу́ду** һауыт-һабаға ялтырауыҡ йүгертеү

**ГЛАЗУ́РЬ** *ж* **1.** (*особый стекловидный сплав*) глазурь, ялтырауыҡ **2.** (*сироп*) глазурь, шәкәр шәрбәте

**ГЛА́НДЫ** *мн.* (*ед.* **гла́нда** *ж*) гланда, аңҡау биҙе

**ГЛАС: глас вопию́щего в пусты́не** *книжн.* яуапһыҙ ҡалдырылған ауаз (*кешенең ялыныуына илтифат итмәү*)

**ГЛАСИ́ТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *книжн.* белдереү, хәбәр биреү, әйтеү, тиеү; **зако́н гласи́т так** закон былай ти; **э́тот пара́граф гласи́т сле́дующее** был параграф түбәндәгене белдерә

**ГЛА́СНОСТЬ** *ж* билдәлелек, асыҡлыҡ, һәр кемгә билдәле (булыу) итеү; **пери́од гла́сности** билдәлелек дәүере; **преда́ть гла́сности** халыҡҡа билдәле итеү

**ГЛА́СНЫЙ I,** -ая, -ое *лингв.* һуҙынҡы; **гла́сный звук** һуҙынҡы өн

**ГЛА́СНЫЙ II,** -ая, -ое асыҡ, халыҡтан йәшерен булмаған; **гла́сный суд** асыҡ суд

**ГЛАУКО́МА** *ж*; *мед.* глаукома, һары һыу (*күҙ ауырыуы*)

**ГЛАША́ТАЙ** *м* **1.** *уст.* һөрәнсе, белдереүсе **2.** *перен., высок.* белдереүсе, яҡлаусы; **глаша́тай и́стины** хәҡиҡәт яҡлаусы

**ГЛЕ́ТЧЕР** *м* глетчер, боҙлоҡ (*тауҙарҙан шыуышып төшә торған боҙлоҡ*)

**ГЛИКОГЕ́Н** *м* гликоген (*ҡандағы шәкәрҙән бауырҙа, мускулдарҙа барлыҡҡа килгән төп һаҡлыҡ углевод*)

**ГЛИ́НА** *ж* балсыҡ, мәте; **кра́сная гли́на** ҡыҙыл балсыҡ; **огнеупо́рная гли́на** утҡа сыҙамлы балсыҡ; **меси́ть гли́ну** балсыҡ баҫыу

**ГЛИ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое балсыҡлы, мәтеле; **гли́нистая по́чва** мәтеле тупраҡ

**ГЛИНОБИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое балсыҡ ҡатыш; **глинобитная стена́** балсыҡ ҡатыш стена

**ГЛИНОЗЁМ** *м* глинозём (*алюминий окисы*)

**ГЛИ́НЯНЫЙ,** -ая, -ое балсыҡ; **гли́няный горшо́к** балсыҡ көршәк

**ГЛИ́ССЕР** *м* глиссер (*яҫы төплө, тиҙ йөрөшлө кәмә*)

**ГЛИСТ** *м* (*у людей*) бабасыр; (*у животных*) селәүсен; **ле́нточные глисты́** таҫма селәүсендәр

**ГЛИСТОГО́ННЫЙ,** -ая, -ое бабасыр (селәүсен) төшөрә торған; **глистого́нное сре́дство** бабасыр төшөрә торған дарыу (сара)

**ГЛИЦЕРИ́Н** *м* глицерин

**ГЛИЦЕРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** глицерин ...ы; **глицери́новое произво́дство** глицерин етештереү **2.** глицеринлы; **глицери́новое мы́ло** глицеринлы һабын

**ГЛОБА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое глобаль (*бөтә Ер шарын үҙ эсенә алған*); **глоба́льная зада́ча** глобаль мәсьәлә ♦ **глоба́льная раке́та** глобаль ракета (*Ер шарының теләһә ниндәй нөктәһенә етә алған*)

**ГЛО́БУС** *м* глобус

**ГЛОДА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* кимереү; **глода́ть ко́сть** һөйәк кимереү **2.** *кого*; *перен.* ғазаплау, борсоу, яфалау; **его́ гло́жет со́весть** уны выжданы ғазаплай

**ГЛОССА́РИЙ** *м*; *лингв.*, *лит.* глоссарий (*күбеһенсә боронғо яҙмалағы аңлашылмаған йәки иҫкергән һүҙҙәрҙе аңлатып, берәй текстҡа ҡушымта итеп биргән аңлатмалар*)

**ГЛОТА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* йотоу; **глота́ть пилю́ли** төймә дарыу йотоу **2.** *что*; *перен.* йотлоғоп уҡыу ♦ **глота́ть во́здух** һауа һулау; **глота́ть слёзы** күҙ йәшен йотоу (*иламаҫҡа тырышыу*); **глота́ть слова́** һүҙҙәрҙе йотоп һөйләү; **глота́ть слю́нки** тамшаныу (*ашағы килеп*)

**ГЛО́ТКА** *ж* **1.** йотҡолоҡ; **заболева́ния гло́тки** йотҡолоҡ ауырыуҙары **2.** *прост.* тамаҡ, алҡым

**ГЛОТНУ́ТЬ** *сов. что, чего* и *без доп.* йотоу, йотоп ебәреү (ҡуйыу)

**ГЛОТО́К** *м* **1.** йотоу; **вы́пить в два глотка́** ике йотоуҙа эсеп бөтөрөү **2.** йотом; **два глотка́ воды́** ике йотом һыу

**ГЛО́ХНУТЬ** *несов.* **1.** һаңғыраулаңыу **2.** (*затихать — о звуках*) тыныу; **шум постепе́нно гло́хнет** тауыш аҡрынлап тына **3.** һүнеү; **мото́р два ра́за глох** мотор ике тапҡыр һүнде **4.** (*приходить в запустение*) үлән (сүп) баҫыу, ташландыҡ хәлгә килеү; **сад гло́хнет** баҡсаны сүп баҫа

**ГЛУБИНА́** *ж* **1.** тәрәнлек; **больша́я глубина́** ҙур тәрәнлек; **измере́ние глубины́** тәрәнлекте үлсәү; **глубина́ коло́дца** ҡоҙоҡтоң тәрәнлеге **2.** (*значительность*) тәрәнлек; **глубина́ ана́лиза** анализдың тәрәнлеге; **глубина́ кри́зиса** кризистың тәрәнлеге; **глубина́ мы́сли** фекер тәрәнлеге **3.** *прям.*, *перен.* төпкөл, түр; **в глубине́ ле́са** урман төпкөлөндә; **из глубины́ жи́зни** тормош төпкөлөнән ♦ **в глубине́ веко́в** быуаттар төпкөлөндә; **из глубины́ веко́в** быуаттар төпкөлөнән; **в глубине́ души́ (се́рдца)** күңел (йөрәк) түрендә; **до глубины́ души́ (се́рдца)** бик ныҡ үҙәккә үтеү, сиктән тыш тетрәндереү; **от глубины́ души́ (се́рдца)** ысын күңелдән (йөрәктән)

**ГЛУБИ́НКА** *ж*; *разг.* төпкөл (*үҙәктән йыраҡтағы йәшәү урыны*); **жить в глуби́нке** төпкөлдә йәшәү

**ГЛУБИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәрәндәге, тәрәндән; **глуби́нный лов ры́бы** тәрәндән балыҡ тотоу; **глуби́нные тече́ния** тәрәндәге ағымдар **2.** төпкөл, төпкөлдәге; **глуби́нные сёла** төпкөл ауылдар

**ГЛУБО́КИЙ,** -ая, -ое **1.** тәрән, төплө, сөм; **глубо́кий коло́дец** тәрән ҡоҙоҡ; **глубо́кая вспа́шка** тәрән һөрөү; **глубо́кая таре́лка** сөм тәрилкә; **глубо́кий снег** тәрән ҡар; **глубо́кие ко́рни** тәрән тамырҙар; **глубо́кое дыха́ние** тәрән һулыш; **глубо́кие зна́ния** төплө белем; **глубо́кие измене́ния** тәрән үҙгәрештәр; **глубо́кий интере́с** тәрән ҡыҙыҡһыныу; **глубо́кое чу́вство** тәрән тойғо; **глубо́кий сон** тәрән йоҡо **2.** *прям.*, *перен.* алыҫ, йыраҡ; **глубо́кий тыл** алыҫ тыл; **глубо́кая старина́** алыҫ тарих **3.** (*достигший предела в развитии, течении*) ҡара, үтә; **глубо́кая зима́** ҡара ҡыш; **глубо́кая ночь** ҡара төн; **глубо́кая ста́рость** үтә ныҡ ҡартлыҡ ♦ **глубо́кий взгляд (взор)** тәрән ҡараш; **глубо́кий го́лос** ҡалын тауыш; **глубо́кий покло́н** башты (ныҡ) түбән эйеү

**ГЛУБОКО́** и **ГЛУБО́КО** **1.** *нареч.* тәрән; **глубоко́ вы́рыть я́му** соҡорҙо тәрән ҡаҙыу **2.** *нареч.* бик ныҡ, тәрән; **глубоко́ пережива́ть** бик ныҡ кисереү **3.** *в знач. сказ.* тәрән; **здесь о́чень глубоко́** бында бик тәрән

**ГЛУБОКОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәрән һыулы; **глубоково́дная река́** тәрән һыулы йылға **2.** тәрән һыу аҫты ...ы; **глубоково́дные иссле́дования** тәрән һыу аҫты тикшеренеүҙәре **3.** тәрән һыуҙағы, тәрән һыу ...ы; **глубоково́дные ры́бы** тәрән һыу балыҡтары

**ГЛУБОКОМЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое тәрән мәғәнәле (уйлы, фекерле); төплө; **глубокомы́сленное замеча́ние** тәрән мәғәнәле иҫкәрмә; **глубокомы́сленный взор** тәрән мәғәнәле ҡараш; **глубокомы́сленный челове́к** тәрән фекерле кеше

**ГЛУБОКОМЫ́СЛИЕ** *с* тәрән фекерлелек (мәғәнәлелек), соғоллоҡ

**ГЛУБОКОУВАЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое хөрмәтле (*ихтирамлы мөрәжәғәт*)

**ГЛУБЬ** *ж см.* **глубина́** 1, 3

**ГЛУМИ́ТЬСЯ** *несов. над кем-чем* мәсхәрәләү, мыҫҡыллау, мыҫҡыл (мәсхәрә) итеү

**ГЛУМЛЕ́НИЕ** *с см.* **глуми́ться**

**ГЛУПЕ́ТЬ** *несов.* аңраланыу, алйотланыу, ахмаҡланыу, йүләрләнеү

**ГЛУПЕ́Ц** *м* аңра, алйот, ахмаҡ, йүләр

**ГЛУПИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* ахмаҡланыу, алйотланыу, йүләрләнеү, ахмаҡлыҡ (алйотлоҡ, йүләрлек) эшләү

**ГЛУ́ПОСТЬ** *ж* **1.** ахмаҡлыҡ, алйотлоҡ, йүләрлек; **по глу́пости** ахмаҡлыҡ менән **2.** ахмаҡлыҡ, алйотлоҡ, йүләрлек, ахмаҡ һүҙ (фекер); **де́лать глу́пость** ахмаҡлыҡ эшләү; **сказа́ть глу́пость** ахмаҡ һүҙ әйтеү

**ГЛУ́ПЫЙ,** -ая, -ое **1.** ахмаҡ, алйот, аңра, йүләр; **глу́пый челове́к** аңра кеше; **глу́пый вид** ахмаҡ ҡиәфәт **2.** мәғәнәһеҙ, аҡылһыҙ, ахмаҡ; **глу́пая зате́я** ахмаҡ эш; **зада́ть глу́пый вопро́с** мәғәнәһеҙ һорау биреү

**ГЛУХАРИ́НЫЙ,** -ая, -ое һуйыр ...ы; **глухари́ный ток** һуйыр уйыны

**ГЛУХА́РЬ** *м* **1.** һуйыр **2.** *прост.* (*глухой человек*) һаңғырау

**ГЛУХО́Й,** -ая, -ое **1.** һаңғырау; **глух на одно́ у́хо** бер ҡолаҡҡа һаңғырау **2.** *перен.* (*равнодушный*) иғтибарһыҙ, ишетмәй (ҡолаҡ һалмай) торған; **он глух к мои́м про́сьбам** ул минең үтенестәремә ҡолаҡ һалмай **3.** (*о звуках*) һаңғырау, тоноҡ, ишетелер-ишетелмәҫ, эстән генә; **глухо́й ро́пот** эстән генә һуҡраныу; **глухо́й го́лос** тоноҡ тауыш **4.** *перен.* (*слабый, неопределённый, затаённый*) эске, быҫҡып ятҡан, һиҙелер-һиҙелмәҫ, йәшерен; **глухо́й проте́ст** йәшерен протест **5.** (*заросший*) үлән баҫҡан, ташландыҡ; **глухо́й сад** үлән баҫҡан баҡса **6.** (*сплошной*) тотош, тәҙрә-ишекһеҙ; **глуха́я стена́** тотош стена **7.** *перен.* тын, һил; **глуха́я у́лица** тын урам ♦ **глухо́е окно́** һуҡыр (яһалма) тәҙрә (*яҡтылыҡ төшмәгән*); **глуха́я крапи́ва** һуҡыр кесерткән; **глухо́й согла́сный** *лингв.* һаңғырау тартынҡы

**ГЛУХОМА́НЬ** *ж см.* **глушь**

**ГЛУХОНЕМО́Й,** -ая, -ое **1.** һаңғырау-телһеҙ **2.** *в знач. сущ.* **глухонемо́й** *м* и **глухонема́я** *ж* һаңғырау-телһеҙ (*кеше*); **шко́ла для глухонемы́х** һаңғырау-телһеҙҙәр мәктәбе

**ГЛУХОТА́** *ж* һаңғыраулыҡ, һаңғырау булыу; **страда́ть глухото́й** һаңғыраулыҡтан йонсоу (йөҙәү)

**ГЛУШИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** *тех.* тауыш йотҡос, тауыш кәметкес, томалағыс **2.** *перен.* ирек бирмәүсе, (ниҙелер) быуыусы, томалаусы; **глуши́тель свобо́ды** ирек быуыусы

**ГЛУШИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* томалау, баҫыу, ишеттермәү; **глуши́ть звук** тауышты баҫыу **2.** *что* баҫыу, ҡаплау; **сорняки́ глу́шат сад** сүп үләндәре баҡсаны баҫа **3.** *что*; *перен.* быуыу, томалау, ирек бирмәү; **глуши́ть инициати́ву** инициативаға ирек бирмәү **4.** *что*; *разг.* һүндереү, баҫыу, томалау; **глуши́ть самова́р** самауыр(ҙы) баҫыу; **глуши́ть мото́р** мотор(ҙы) һүндереү **5.** *кого*; *разг.* иҫәңгерәтеү, шаңғытыу; **глуши́ть ры́бу** балыҡ(ты) шаңғытыу ♦ **глуши́ть во́дку (вино́ и т.п.)** *прост.* араҡыны (шарапты һ.б.) күп эсеү

**ГЛУШЬ** *ж* ҡараңғы яҡ, төпкөл (урын); **жить в глуши́** төпкөлдә йәшәү

**ГЛЫ́БА** *ж* ҙур киҫәк; **ка́менная глы́ба** ҙур таш киҫәге; **глы́ба льда** ҙур боҙ киҫәге

**ГЛЮКО́ЗА** *ж* глюкоза (*ҡуҙылсалы емештәрендә һәм йәнле организмдарҙа була торған шәкәр*)

**ГЛЯДЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *в разн. знач.* ҡарау; **гляде́ть в окно́** тәҙрәнән ҡарау; **гляде́ть в бу́дущее с наде́ждой** киләсәккә өмөт менән ҡарау **2.** *на что*; *перен.* ҡарау; **тре́зво гляде́ть на жизнь** тормошҡа айыҡ ҡарау; **3.** *за кем-чем*; *разг.* ҡарау, бағыу; **гляде́ть за детьми́** балаларҙы ҡарау **4.** *на что* ҡарау, йүнәлеү; **о́кна глядя́т на юг** тәҙрәләр көньяҡҡа ҡарай **5.** *перен., разг.* күренеү; **из-за туч гляде́ло со́лнце** болоттар араһынан ҡояш күренде ♦ **гляде́ть в о́ба** һаҡ булыу, абай булыу, алды-артты ҡарап эш итеү; **гляде́ть ко́со** ҡырын ҡарау; **гляде́ть пра́вде в глаза́** дөрөҫлөктән ҡурҡмау; **куда́ глаза́ глядя́т** ҡайҙа етте, шунда; баш һуҡҡан яҡҡа; **на́ ночь гля́дя** төнгә ҡарай, төнгә ҡаршы; **на свет не гляде́л бы** яҡты донъянан биҙеү (ялҡыу, туйыу); **того́ и гляди́** күр ҙә тор

**ГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *несов. во что* үҙеңде ҡарау; **гляде́ться в зе́ркало** көҙгөнән үҙеңде ҡарау

**ГЛЯДЬ** *межд. в знач. сказ.*; *разг.* ҡара; **глядь, он идёт** ҡара, ул килә

**ГЛЯ́НЕЦ** *м* ялтырауыҡ; **гля́нец потускне́л** ялтырауыҡ тоноҡлонған ♦ **навести́ гля́нец** ялт иттереп ҡуйыу

**ГЛЯ́НУТЬ** *сов.* ҡарап алыу, ҡарап ҡуйыу

**ГЛЯНЦЕВА́ТЬ** *несов. что* ялтыратыу, ялтырауыҡлау; **глянцева́ть фо́то** фотоны ялтыратыу

**ГЛЯ́НЦЕВЫЙ,** -ая, -ое ялтырауыҡлы; **гля́нцевая бума́га** ялтырауыҡлы ҡағыҙ

**ГЛЯЦИО́ЛОГ** *м* гляциолог, гляциология белгесе

**ГЛЯЦИОЛО́ГИЯ** *ж* гляциология (*боҙлоҡтарҙы өйрәнә торған фән*)

**ГМ** *межд.* һе, улай икән

**ГНАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ҡыуыу, ҡыуып ебәреү; **гнать ста́до** көтөү ҡыуыу; **ве́тер го́нит ту́чи** ел болоттарҙы ҡыуа; **гнать на полевы́е рабо́ты** ялан эшенә ҡыуыу; **гнать плоты́** һал ҡыуыу; **гнать ло́шадь во весь опо́р** атты бар көсөнә ҡыуыу **2.** *кого* баҫтырыу, ҡыуыу; **соба́ка го́нит за́йца** эт ҡуян ҡыуа **3.** *без доп.*; *разг.* (*мчаться, нестись*) елдереү, саптырыу, ҡыуыу; **гнать маши́ну** машинаны ҡыуыу; **гнать на коне́** атта елдереү **4.** *перен., разг.* ашыҡтырыу, тиҙләтеү; **гнать рабо́ту** эште ашыҡтырыу **5.** *что* ҡыуыу, ҡайнатыу; **гнать дёготь** дегет ҡайнатыу;

**гнать спирт** спирт ҡыуыу ♦ **гнать в ше́ю**; **гнать взаше́й** *прост.* төрткөләп (этеп-төртөп) сығарыу

**ГНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *за кем-чем*; *разг.* ҡыуыу, артынан ҡыуыу, баҫтырыу, ҡыуып (баҫтырып) барыу; **гна́ться за за́йцем** ҡуян артынан ҡыуыу; **гна́ться по пята́м** арттан (эҙенән) ҡалмай ҡыуыу (баҫтырыу) **2.** ынтылыу, ҡыуыу; **гна́ться за при́былью** табыш артынан ҡыуыу **3.** *страд. от* **гнать** 1, 2, 4

**ГНЕВ** *м* асыу; **вспы́шка гне́ва** асыу тоҡаныу; **в поры́ве гне́ва** асыу ҡабарғанда ♦ **смени́ть гнев на ми́лость** асыуҙы баҫыу, асыуҙы онотоу

**ГНЕ́ВАТЬСЯ** *несов. на кого-что* и *без доп.* асыуланыу; **гне́ваться на дете́й** балаларға асыуланыу

**ГНЕВЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое асыусан; **гневли́вый челове́к** асыусан кеше; **быть гневли́вым** асыусан булыу

**ГНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое асыулы; **гне́вный взгляд** асыулы ҡараш; **быть гне́вным** асыулы булыу

**ГНЕДО́Й,** -ая, -ое (*о масти лошади*) туры; **гнедо́й жеребёнок** туры ҡолон

**ГНЕЗДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** оялау; **ла́сточки гнездя́тся на берегу́** ҡарлуғастар ярға оялай **2.** *перен.* (*ютиться*) урын алыу, урынлашыу; **бедняки́ гнезди́лись в при́городе** ярлы халыҡ ҡала янына урынлашҡан **3.** *перен.* тулыу, тулып ятыу; **в голове́ гнезди́лись назо́йливые мы́сли** башҡа эс бошорғос уйҙар тулған

**ГНЕЗДО́** *с* **1.** *прям.*, *перен.* оя; **гнездо́ ла́сточки** ҡарлуғас ояһы; **воровско́е гнездо́** ҡараҡтар ояһы; **вить гнездо́** оя яһау; **гнездо́ грузде́й** гөрөҙҙәләр ояһы; **гнездо́ бе́лых цвето́в** аҡ сәскәләр ояһы; **гнездо́ слов в словаре́** һүҙлектә һүҙҙәр ояһы **2.** *перен.* (*домашний очаг*) оя, ҡыуыш, йорт, төлөк **3.** уйым, уйымтыҡ; **гнездо́ для патро́нов** патрон уйымтығы **4.** соҡор, урын; **пулемётное гнездо́** пулемет соҡоро; **сна́йперское гнездо́** снайпер урыны **5.** *с.-х.* оя ♦ **свить (себе́) гнездо́**: 1) ғаилә ҡороу, йорт һалыу; 2) *перен.* нығыныу, үҙеңде раҫлау

**ГНЕЗДОВА́НИЕ** *с см.* **гнездова́ться**; **пери́од гнездова́ния птиц** ҡоштарҙың бала сығарыу осоро

**ГНЕЗДОВА́ТЬСЯ** *несов.* оялау, оя ҡороу, бала сығарыу

**ГНЕЗДОВО́Й,** -ая, -ое оялап башҡарылған, оя итеп эшләнгән; **гнездово́й посе́в** оя итеп сәсеү

**ГНЕЗДО́ВЬЕ** *с* оялау урыны; **пти́чье гнездо́вье** ҡоштарҙың оялау урыны

**ГНЕЙС** *м*; *мин.* гнейс (*кварц*, *шпат һәм слюданан торған тау тоҡомо*)

**ГНЕСТИ́** *несов.* **1.** *что* ҡыҫыу, һығыу **2.** *кого-что*; *перен.* интектереү, яфалау; **тоска́ гнетёт** һағыш яфалай

**ГНЁТ** *м* **1.** (*пресс*) баҫырау, баҫтырыҡ **2.** ҡыҫыу, ҡыҫырынҡылау, иҙеү; **национа́льный гнёт** милли ҡыҫырынҡылыҡ

**ГНЕТУ́ЩИЙ,** -ая, -ее ауыр, күңелһеҙ; **гнету́щее впечатле́ние** ауыр тәьҫир; **гнету́щие мы́сли** ауыр уйҙар

**ГНИ́ДА** *ж* **1.** һеркә **2.** *прост.*, *бран.* ас бет

**ГНИЕ́НИЕ** *с* сереү; **гние́ние овоще́й** йәшелсәләрҙең сереүе

**ГНИЛЕ́Ц** *м*; *пчел.* серек ауырыуы

**ГНИЛО́Й,** -ая, -ое **1.** *прям.*, *перен.* серек; **гнилы́е зу́бы** серек тештәр; **гнило́е я́блоко** серек алма; **гнила́я тео́рия** серек теория; **гнило́е о́зеро** серек күл **2.** (*о погоде*, *климате*, *времени года*) еүеш, йонсоу, ямғырлы; **гнила́я о́сень** ямғырлы көҙ

**ГНИ́ЛОСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** серегән, сереү ...ы; **гни́лостный за́пах** серегән еҫ **2.** сереткес, серетә торған; **гни́лостные бакте́рии** сереткес бактериялар

**ГНИЛУ́ШКА** *ж*; *разг.* сөрөк; **дыми́ть гнилу́шками** сөрөк төтәтеү

**ГНИЛЬ** *ж* **1.** серек, серегән нәмә **2.** (*плесень*) үңәҙ

**ГНИЛЬЁ** *с собир.*; *разг.* сөрөк-сарыҡ, серегән нәмәләр

**ГНИЛЬЦА́: с гнильцо́й** *разг.* серей башлаған, боҙола башлаған; **я́блоки с гнильцо́й** серей башлаған алмалар

**ГНИТЬ** *несов.*; *прям.*, *перен.* сереү; **дрова́ гниют** утын серей; **ры́ба гниёт** балыҡ серей; **се́но гниёт** бесән серей; **гнить в тюрьме́** төрмәлә сереү

**ГНОЕ́НИЕ** *с см.* **гнои́ть**, **гнои́ться**; **гное́ние ра́ны** яра эренләү

**ГНОЕОТДЕЛЕ́НИЕ** *с* эрен бүлеп сығарыу (бүленеп сығыу)

**ГНОЕОТДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эрен бүлеп сығарыу ...ы; **гноеотдели́тельный проце́сс** эрен бүлеп сығарыу процесы

**ГНОЕРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое эрен барлыҡҡа килтерә торған; **гноеро́дные бакте́рии** эрен барлыҡҡа килтерә торған бактериялар

**ГНОИ́ТЬ** *несов. кого-что*; *прям.*, *перен.* серетеү; **дождь гнои́т се́но** ямғыр бесәнде серетә; **гнои́ть в тюрьме́** төрмәлә серетеү

**ГНОИ́ТЬСЯ** *несов.* эренләү; **ра́на ещё гнои́тся** яра һаман эренләй

**ГНОЙ** *м* эрен; **из ра́ны выделя́ется гной** яранан эрен аға

**ГНОЙНИ́К** *м* эрен үҙәге; **вскрыть гнойни́к** эрен үҙәген ярыу

**ГНО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эрен ...ы; эренләү ...ы; **гно́йное выделе́ние** эрен сығыуы (бүленеүе); **гно́йный проце́сс** эренләү процесы **2.** эренле; **гно́йная о́пухоль** эренле шеш

**ГНОМ** *м* гном (*Көнбайыш Европа мифологияһында*: *ер аҫты хазинаһын һаҡлап торған кәрлә*)

**ГНОСЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *филос.* гносеологик; **гносеологи́ческие взгля́ды** гносеологик ҡараштар; **гносеологи́ческие вы́воды** гносеологик һығымталар

**ГНОСЕОЛО́ГИЯ** *ж*; *филос.* гносеология (*танып белеү теорияһы — донъяны танып белеү мөмкинлеге һәм шул таныпбелеүҙең дөрөҫлөгө, ысынлығы тураһындағы фәлсәфәүи тәғлимәт*)

**ГНУС** *м собир.* себен-серәкәй

**ГНУСА́ВИТЬ** *несов.* тыңҡышланыу, тыңҡаулаңыу

**ГНУСА́ВОСТЬ** *ж* тыңҡышлыҡ, тыңҡаулыҡ

**ГНУСА́ВЫЙ,** -ая, -ое тыңҡыш, тыңҡау, һиңрәү; **гнуса́вый го́лос** һиңрәү тауыш; **гнуса́вый ребёнок** тыңҡыш бала; **быть гнуса́вым** тыңҡыш булыу

**ГНУ́СНОСТЬ** *ж* әшәкелек, ҡәбәхәтлек, хәсислек; **гну́сность поведе́ния** үҙ-үҙен тотоуҙың хәсислеге; **соверша́ть гну́сности** әшәкелектәр эшләү

**ГНУ́СНЫЙ,** -ая, -ое ҡәбәхәт, ерәнес, хәсис; **гну́сная клевета́** ерәнес яла; **гну́сный челове́к** хәсис кеше

**ГНУ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **гнуть 2.** *прил.* бөгөлгән, бөгөп эшләнгән; **гну́тая ме́бель** бөгөп эшләнгән йорт йыһаҙы

**ГНУТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* бөгөү; **гнуть про́волоку** сым бөгөү; **гнуть подко́вы** даға бөгөү **2.** *что* бөгөү, эйеү; **бу́ря гнёт дере́вья** дауыл ағастарҙы эйә **3.** *что, к чему* и *без доп.*; *перен., прост.* ҡайырыу; **гнуть своё** үҙеңдекен ҡайырыу ♦ **гнуть горб (спи́ну, хребе́т)** бил бөгөү, баш күтәрмәй эшләү; **гнуть ше́ю (спи́ну, хребе́т)** *перед кем* баш эйеү, йөҙ һыуы түгеү; **гнуть в три поги́бели** бишкә бөгөү, яфа сиктереү; **гнуть (свою́, одну́ и т.п.) ли́нию** үҙ яғыңды ҡайырыу

**ГНУ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бөгөлөү, эйелеү, һығылыу; **дере́вья гну́тся от ве́тра** ағастар елдән һығыла **2.** (*обладать гибкостью*) бөгөлөү; **про́волока гнётся** сым бөгөлә **3.** *страд. от* **гнуть**

**ГНУША́ТЬСЯ** *несов. кого-чего, кем-чем* и *с неопр.* ерәнеү, сикәнеү, ғәрлек (хурлыҡ) тип һанау

**ГОБЕЛЕ́Н** *м* гобелен (**1.** *биҙәкләп эшләнгән һүрәтле стена келәме* **2.** *беше итеп һуғылған декоратив туҡыма*)

**ГОБОИ́СТ** *м* гобойсы (*гобойҙа уйнаусы музыкант*)

**ГОБО́Й** *м*; *муз.* гобой (*тынлы музыка ҡоралы*); **игра́ть на гобо́е** гобойҙа уйнау

**ГОВЕ́ТЬ** *несов.*; *рел.* христиандарҙа ураҙа тотоу, сиркәүгә йөрөү, тәүбәгә килеү

**ГО́ВОР** *м* **1.** һөйләшеү, һөйләшкән тауыш; **ти́хий го́вор** әкрен һөйләшеү **2.** (*манера произносить*) һөйләшеү; **его́ го́вор отлича́ется певу́честью** уның һөйләшеүе көйлөлөгө менән айырылып тора **3.** *лингв.* һөйләш; **сре́дний го́вор башки́рского языка́** башҡорт теленең урта һөйләше; **изуче́ние го́воров** һөйләштәрҙе өйрәнеү

**ГОВОРИ́ЛЬНЯ** *ж*; *разг., пренебр.* һүҙ буткаһы урыны, файҙаһыҙ күп һүҙ һөйләү

**ГОВОРИ́ТЬ** *несов.* **1.** һөйләшеү; **ребёнок уже́ говори́т** бала һөйләшә инде; **свобо́дно говори́ть по-ру́сски** урыҫса иркен һөйләшеү **2.** *что* и *без доп.* (*сообщать факты и т.п., произносить что-л.*) һөйләү, әйтеү; **говори́ть пра́вду** дөрөҫөн һөйләү; **говори́ть комплиме́нты** комплименттар әйтеү; **говори́ть с уве́ренностью** ышаныс менән һөйләү **3.** *с кем* (*беседовать*) һөйләшеү, гәпләшеү; **говори́ть с прия́телем** дуҫ менән гәпләшеү **4.** (*свидетельствовать о чём-л.*) әйтеп (һөйләп, белдереп) тороу, һөйләү; **э́тот факт говори́т о мно́гом** был факт күп нәмә тураһында һөйләй **5.** *перен.* (*сказываться в ком-чём-л.*) күренеп тора; **в нём говори́т большо́й о́пыт** уның ҙур тәжрибәле икәнлеге күренеп тора ♦ **говори́ть на ра́зных языка́х** бер-береңде аңлап етмәү; **говоря́т (говорю́) вам (тебе́)** һеҙгә (һиңә) әйтәләр (әйтәм) бит; **и не говори́!** әйтмә (һөйләмә) лә инде! (*аптырауҙы белдерә*); **ина́че говоря́** башҡаса әйткәндә, икенсе төрлө әйткәндә; **по пра́вде говоря́** дөрөҫөн генә әйткәндә; **со́бственно говоря́** асыҡ ҡына итеп әйткәндә; **сам (сама́, само́) за себя́ говори́т** үҙе үк әйтеп тора; **что и говори́ть** әйтеп тораһы ла юҡ; **что (как) ни говори́** ни әйтһәң дә, ни генә тиһәң дә; **что вы говори́те?** һеҙ нимә һөйләйһегеҙ?

**ГОВОРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*произноситься*) әйтеү **2.** *о ком-чём безл.* (*излагаться*) әйтелеү, тиелеү; **в письме́ о нём говори́тся так** хатта уның тураһында былай тиелә **3.** *страд. от* **говори́ть** 2 ♦ **как говори́тся** *в знач. вводн. сл.* әйткәндәй

**ГОВОРЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** һүҙсән, хәбәрсел; **говорли́вый челове́к** хәбәрсел кеше; **быть говорли́вым** һүҙсән булыу **2.** *перен.* сылтырауыҡ; **говорли́вый ручеёк** сылтырауыҡ шишмә

**ГОВОРУ́Н** *м* и **ГОВОРУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* тел биҫтәһе, телдәр, лабырлаҡ; (*о детях*) тәтелдәк

**ГОВЯ́ДИНА** *ж* һыйыр ите; **суп с говя́диной** һыйыр итенән бешерелгән аш

**ГОВЯ́ЖИЙ,** -ья, -ье **1.** һыйыр ите ...ы; **говя́жьи котле́ты** һыйыр ите котлеты **2.** һыйыр ...ы; **говя́жий жир** һыйыр майы, туң май; **говя́жья пе́чень** һыйыр бауыры

**ГО́ГОЛЬ** *м* ала сумғалаҡ (*ҡош*) ♦ **го́голем ходи́ть** ҡупрайып фырт йөрөү, танау күтәреү

**ГО́ГОЛЬ-МО́ГОЛЬ** *м* гоголь-моголь (*шәкәрләп туҡылған сей йомортҡа*)

**ГО́ГОТ** *м* **1.** ҡаңғылдау, ҡыйғаҡлау; **го́гот гусе́й** ҡаҙҙар ҡаңғылдауы **2.** *прост.* һаһылдау

**ГОГОТА́НЬЕ** *с* **1.** ҡаңғылдау, ҡыйғаҡлау; **гогота́нье гу́сей** ҡаҙҙар ҡаңғылдауы **2.** *прост.* һаһылдау

**ГОГОТА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡаңғылдау, ҡыйғаҡлау; **гу́си гого́чут** ҡаҙҙар ҡыйғаҡлай **2.** *прост.* (*хохотать*) һаһылдау

**ГОД** *м* **1.** йыл; **бу́дущий год** киләһе йыл; **в про́шлом году́** уҙған йылда, былтыр; **четы́ре**

**вре́мени го́да** йылдың дүрт миҙгеле **2.** (*о возрасте*) йәш; **ребёнку два го́да** балаға ике йәш **3.** *мн.* **го́ды** (*период времени*) йыл, саҡ; **молоды́е го́ды** йәш саҡтар; **в го́ды ю́ности** йәшлек йылдарында **4.** *мн.* **го́ды** (*промежуток времени в пределах десятилетия*) йылдар; **девяно́стые го́ды** туҡһанынсы йылдар ♦ **високо́сный год** кәбисә йылы; **календа́рный год** календарь йылы; **кру́глый год** йыл буйына (әйләнәһенә); **лу́нный год** ай йылы (*кояш йылынан 11 көнгә ҡыҫҡараҡ*); **Но́вый год** Яңы йыл; **уче́бный (академи́ческий) год** уҡыу йылы, академик йыл; **бе́з году неде́ля** *шутл.* аяҡ баҫып өлгөрмәгән; башы инһә, аяғы инмәгән (*күптән түгел, яңы ғына*); **в года́х** оло йәштәрҙә; **не по года́м** йәш булыуға ҡарамаҫтан; **год на́ год не прихо́дится** йылдыҡы йылға тура килмәй; **год о́т году**; **год от го́да** йылдан-йыл, йыл һайын; **из го́да в год** йылдан-йылға

**ГОДА́МИ** *нареч.* йылдар буйына; **они́ года́ми не встреча́лись** улар йылдар буйына осрашманы

**ГОДИ́НА** *ж*; *высок.* йылдар; **годи́на испыта́ний** һынау йылдары; **в тяжёлую годи́ну** ауыр йылдарҙа

**ГОДИ́ТЬСЯ** *несов.* ярау, яраҡлы булыу; **э́та доска́ мне годи́тся** был такта миңә берәй эшкә ярар; **э́ти боти́нки мне не годя́тся** был ботинка миңә ярамай; **так поступа́ть не годи́тся** *безл.* улай эшләргә ярамай ♦ **куда́ э́то годи́тся?** бер нигә лә ярамай (эшкинмәй)

**ГОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое йыллыҡ; **годи́чные изде́ржки** йыллыҡ сығымдар; **годи́чный цикл** йыллыҡ цикл ♦ **годи́чные ко́льца** *бот., лес.* йыллыҡ балдаҡтар (*ағас олонондағы*)

**ГО́ДНОСТЬ** *ж* яраҡлылыҡ, яраҡлы булыу; **го́дность зерна́ для посе́ва** орлоҡтоң сәсеүгә яраҡлылығы

**ГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое яраҡлы, ярарлыҡ; **го́дная для питья́ вода́** эсергә яраҡлы һыу; **семена́ годны́ для посе́ва** орлоҡ сәсеүгә яраҡлы

**ГОДОВА́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** бер йәшлек; **годова́лый ребёнок** бер йәшлек бала; **годова́лая тёлка** бер йәшлек башмаҡ **2.** (*пролежавший год*) йыллаған; **годова́лое се́но** йыллаған бесән

**ГОДОВО́Й,** -ая, -ое йыллыҡ; **годово́й дохо́д** йыллыҡ килем; **годово́й план** йыллыҡ план; **сре́дняя годова́я температу́ра** уртаса йыллыҡ температура

**ГОДОВЩИ́НА** *ж* йыллыҡ; **годовщи́на побе́ды** еңеүҙең йыллығы; **деся́тая годовщи́на сва́дьбы** туйҙың ун йыллығы

**ГОЛ** *м*; *спорт.* гол; **заби́ть гол** гол индереү

**ГОЛА́ВЛЬ** *ж* ажау, ҡушбаш; **ста́я голавле́й** ажау эркеүе; **лови́ть голавля́ у́дочкой** ҡармаҡҡа ажау ҡаптырыу

**ГОЛЕНА́СТЫЙ,** -ая, -ое оҙон сираҡлы (аяҡлы, ботло)

**ГОЛЕНИ́ЩЕ** *с* ҡуныс; **сапоги́ с дли́нными голени́щами** оҙон ҡуныслы итек; **голени́ще ва́ленка** быйма ҡунысы

**ГО́ЛЕНЬ** *ж* енсек, сираҡ; **то́нкая го́лень** нәҙек сираҡ

**ГОЛЕ́Ц** *м* **1.** (*пресноводная рыба*) еҙмыйыҡ **2.** (*рыба северных морей*) яланғас балыҡ

**ГОЛИ́К** *м* ырҙын һеперткеһе (*япраҡһыҙ*)

**ГОЛКИ́ПЕР** *м* голкипер, ҡапҡа һаҡсыһы, ҡапҡасы

**ГОЛЛА́НДКА I** *ж см.* **голла́ндцы**

**ГОЛЛА́НДКА II** *ж*; *разг.* (*печь*) галанка

**ГОЛЛА́НДСКИЙ,** -ая, -ое голланд ...ы, Голландия ...ы; **голла́ндское иску́сство** Голландия сәнғәте; **голла́ндская поро́да скота́** голланд тоҡомло мал ♦ **голла́ндский сыр** голланд сыры

**ГОЛЛА́НДЦЫ** *мн.* голландтар, голланд халҡы // *ед.* **голла́ндец** *м* голланд ир-аты; **голла́ндка** *ж* голланд ҡатын-ҡыҙы

**ГО́ЛО** и **ГОЛО́** *нареч.* таҡыр, яланғас

**ГОЛОВА́** *ж* **1.** баш; **голова́ боли́т** баш ауырта; **конь мота́ет голово́й** ат башын сайҡай; **пону́рить го́лову** башты эйеү **2.** (*единица счёта скота*) баш; **сто голо́в ове́ц** йөҙ баш һарыҡ **3.** *перен.* аҡыл, баш; **све́тлая голова́** зирәк (аҡыллы кеше); **челове́к с голово́й** башлы кеше **4.** *м* и *ж чего, кому-чему*; *разг.* баш, башлыҡ; **голова́ го́рода** ҡала башлығы **5.** (*передняя часть отряда, группы и т.п.*) баш; **голова́ демонстра́ции** демонстрацияның башы **6.** (*пищевой продукт в виде шара, конуса*) баш; **голова́ сы́ру** бер баш сыр ♦ **без головы́** башһыҙ, алйот; **с голово́й** башлы, аҡыллы; **в голова́х** баш осонда; **на го́лову (обру́шиться, посы́паться и т.п.)** *чью* башҡа (төшөү); **с головы́** кеше башынан (*ниҙер йыйыу*); **голова́ кру́жится** баш әйләнә; **голова́ идёт кру́гом** *у кого* баш ҡатты, баш тубал кеүек; **голова́ садо́вая** ахмаҡ баш; **ве́шать го́лову** башты түбән эйеү, төшөнкөләккә бирелеү; **вскружи́ть го́лову** *кому* башын әйләндереү; **моро́чить го́лову** *кому* башты ҡаңғыртыу; **положи́ть (сложи́ть) го́лову** ҡорбан булыу, башты һалыу; **заплати́ть голово́й** ғүмерҙе биреү; **отвеча́ть (руча́ться) голово́й** *за кого-что* баш менән яуап биреү; **вбить (вколоти́ть) в го́лову себе́** *что берәй нәмәне* баштан сығармаҫҡа ныҡышыу; **вбить (вколоти́ть) в го́лову** *что* башына туҡыу, башына һеңдереү; **вы́бросить (вы́кинуть) из головы́** баштан сығарып ташлау; **вы́йти (вы́лететь, вы́скочить) из головы́** баштан сығыу, онотолоу; **не выходи́ть (не идти́) из головы́** баштан сыҡмау, уйҙан китмәү; **из головы́ вон** баштан сыҡҡан, иҫтән сыҡҡан; **ходи́ть на голове́** баш түбән йөрөү, ҡотороп шаярыу; **в пе́рвую го́лову** беренсе сиратта, иң тәүҙә; **дать го́лову на отсече́ние** башты киҫергә биреү (*ниҙелер ысын тип ныҡышҡанда әйтелә*); **име́ть го́лову на плеча́х** баш менән (уйлап) эш итеү; **на́ голову вы́ше** *кого* әллә ни тиклем юғары (тороу) (*аҡыл, әхлаҡ*

*яғынан һ.б.*); **на све́жую го́лову (занима́ться, де́лать)** *что* арымаҫ борон, баш арымағанда (*шөгөлләнеү, эшләү*); **на свою́ го́лову** үҙ башына; **с голово́й погрузи́ться (окуну́ться, уйти́ и т.п.)** *во что берәй нәмәгә* мөкиббән китеү, тулыһынса бирелеп китеү; **с головы́ до ног**; **с ног до головы́** баштан-аяҡ; **сам себе́ голова́ (хозя́ин, господи́н и т.п.)** үҙе (үҙем, үҙең) баш, үҙе (үҙем, үҙең) түш; **че́рез го́лову** *чью кемдән дә булһа* уҙып, *кемгәләр* тәүҙә хәбәр итмәй (*ҡайҙалыр мөрәжәғәт итеү*)

**ГОЛОВА́СТИК** *м* сүмесбаш

**ГОЛОВА́СТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** ҙур башлы, тубал баш; **голова́стая воро́на** ҙур башлы ала ҡарға **2.** аҡыллы, зирәк; **голова́стый челове́к** аҡыллы кеше

**ГОЛОВЕ́ШКА** *ж* торонбаш; **в пе́чи тле́ет сыра́я головешка** мейестә сей торонбаш бысҡып ята

**ГОЛОВИ́ЗНА** *ж* балыҡ башы (*ҡыҙыл балыҡ башы һәм һырты*); **суп с голови́зной** балыҡ башынан бешергән һурпа

**ГОЛО́ВКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **голова́** 1, 6; **2.** баш, эшләпә; **голо́вка винта́** винт эшләпәһе; **спи́чечная голо́вка** шырпы башы **3.** *обычно мн.* **голо́вки** баш; **сапо́жные голо́вки** итек баштары

**ГОЛОВНО́Й,** -ая, -ое **1.** баш ...ы; **головна́я боль** баш ауырыуы; **головно́й убо́р** баш кейеме **2.** (*передовой*) алдан (башлап) барыусы, баштағы, алдағы; **головно́й отря́д** алдан барыусы отряд; **головны́е ваго́ны** баштағы вагондар **3.** (*ведущий*) **головно́е предприя́тие** баш предприятие ♦ **головно́й мозг** баш мейеһе

**ГОЛОВНЯ́** *ж* **1.** *см.* **головешка 2.** (*болезнь злаков*) торон; **поража́ться головнёй** торон һуғыу (тейеү)

**ГОЛОВОКРУЖЕ́НИЕ** *с* баш әйләнеү; **чу́вствовать головокруже́ние** баш әйләнеүен һиҙеү

**ГОЛОВОКРУЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баш әйләндергес, баш әйләндерерлек (әйләнерлек); **головокружи́тельная высота́** баш әйләнерлек бейеклек **2.** *перен.* иҫ китерлек; **головокружи́тельный успе́х** иҫ китерлек уңыш

**ГОЛОВОЛО́МКА** *ж* башватҡыс (*йомаҡ, мәсьәлә*); **разга́дывать головоло́мку** башватҡыс сисеү

**ГОЛОВОЛО́МНЫЙ,** -ая, -ое башватҡыс, ҡатмарлы, бик ҡыйын; **головоло́мный вопро́с** ҡатмарлы мәсьәлә

**ГОЛОВОМО́ЙКА** *ж*; *разг.* ҡаты шелтә, нык ҡыҙҙырыу; **зада́ть головомо́йку** бик нык ҡыҙҙырыу

**ГОЛОВОРЕ́З** *м*; *разг.* башкиҫәр

**ГОЛОВОТЯ́П** *м*; *разг., неодобр.* йүнһеҙ, бәшәлкәһеҙ кеше

**ГОЛОВОТЯ́ПСТВО** *с*; *разг., неодобр.* йүнһеҙлек, бәшәлкәһеҙлек

**ГОЛО́ВУШКА** *ж*; *разг., ласк. от* **голова́** 1, 3

**ГОЛОГРА́ФИЯ** *ж* голография (*тулҡындар үҙгәреше нигеҙендә объектты күләмле итеп төшөрөү ысулы*)

**ГО́ЛОД** *м* **1.** ашағы килеү, асығыу, ас булыу; **почу́вствовать го́лод** ашағы килә башлау; **утоли́ть го́лод** асығыуҙы баҫыу; **мори́ть го́лодом** асҡа интектереү; **умере́ть от го́лода** астан үлеү **2.** (*массовое бедствие*) аслыҡ, ҡытлыҡ, йот, йотлоҡ; **начался́ го́лод** йотлоҡ башланды **3.** *перен.* (*нехватка чего-л. нужного*) ҡытлыҡ; **кни́жный го́лод** китапҡа ҡытлыҡ

**ГОЛОДА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **голода́ть 2.** (*в живом организме*) ҡытлыҡ, етешмәү; **кислоро́дное голода́ние** кислородҡа булған ҡытлыҡ; **са́харное голода́ние** шәкәр етешмәү

**ГОЛОДА́ТЬ** *несов.* **1.** (*испытывать голод*) асығыу, ас булыу **2.** (*воздерживаться от пищи*) ас тороу (йәрәү); **голода́ть це́лый день** көнө буйы ас тороу

**ГО́ЛОДНО 1.** *нареч.* ас, аслы-туҡлы; **жить го́лодно** ас йәшәү **2.** *в знач. сказ., безл.* аслыҡ; **во вре́мя войны́ бы́ло го́лодно** һуғыш ваҡытында аслыҡ булды

**ГОЛО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ас; **голо́дный скот** ас мал; **на голо́дный желу́док** ас ҡарынлай; **быть голо́дным** ас булыу **2.** ас, астан (булған), аслыҡтан (булған); **голо́дная смерть** аслыҡтан булған үлем, астан үлеү **3.** аслыҡ, йот, йотлоҡ, ҡытлыҡ; **голо́дный год** аслыҡ йыл; **голо́дный край** йот яҡ **4.** *разг.* аслы-туҡлы, етер-етмәҫ; **голо́дный паёк** етер-етмәҫ паёк

**ГОЛОДО́ВКА** *ж*; *разг.* аслыҡ, ашауҙан баш тартыу; **объяви́ть голодо́вку** аслыҡ иғлан итеү

**ГОЛОЛЁД** *м см.* **гололе́дица**

**ГОЛОЛЕ́ДИЦА** *ж* боҙлауыҡ, тайғаҡ; **на у́лице гололе́дица** тышта боҙлауыҡ

**ГОЛОНО́ГИЙ,** -ая, -ое *разг.* ялан аяҡ (аяҡлы), яланғас аяҡлы; **голоно́гий мальчи́шка** ялан аяҡлы малай

**ГОЛОПУ́ЗЫЙ,** -ая, -ое *прост.* яланғас ҡорһаҡлы (*гәҙәттә, балаларға ҡарата*)

**ГО́ЛОС** *м* **1.** *в разн. знач.* тауыш; **высо́кий го́лос** нәҙек тауыш; **ни́зкий го́лос** ҡалын тауыш; **де́тские голоса́** балалар тауышы; **реша́ющий го́лос** хәл иткес тауыш; **го́лос мото́ров** моторҙар тауышы; **го́лос соловья́** һандуғас тауышы; **подсчёт голосо́в** тауыштарҙы иҫәпләү (*һайлау ваҡытында*); **рома́нс для же́нского го́лоса** ҡатынҡыҙ тауышы өсөн романс; **избра́ть большинство́м голосо́в** күпселек тауыш менән һайлау; **повы́сить го́лос** тауыш күтәреү; **узна́ть по го́лосу** тауыштан таныу **2.** *перен.* ауаз, тауыш; **вну́тренний го́лос** эске ауаз; **го́лос со́вести** выждан ауазы **3.** (*мнение, суждение*) фекер, һүҙ; **го́лос чита́телей** уҡыусылар фекере; **прислу́шиваться к го́лосу наро́да** халыҡтың фекеренә ҡолаҡ һалыу ♦ **во весь го́лос** бар көскә (һөрән һалыу, һөрәнләү); **(все) в оди́н го́лос** бер тауыштан; **с чу-**

**жо́го го́лоса петь** кеше һүҙен һөйләү, кеше йырын йырлау

**ГОЛОСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое көслө тауышлы

**ГОЛОСИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.*; *прост.* аҡырып йырлау (ҡысҡырыу); **голоси́ть пе́сню** аҡырып йыр йырлау **2.** (*громко, с причитаниями плакать*) һамаҡлап (әйтемләп) илау; **голоси́ть по поко́йнику** мәйет өҫтөндә әйтемләп илау

**ГОЛОСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое дәлилһеҙ; **голосло́вное обвине́ние** дәлилһеҙ ғәйепләү

**ГОЛОСОВА́НИЕ** *с* тауыш, тауыш биреү; **откры́тое голосова́ние** асыҡ тауыш биреү; **та́йное голосова́ние** йәшерен тауыш биреү; **ста́вить вопро́с на голосова́ние** мәсьәләне тауышҡа ҡуйыу

**ГОЛОСОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *за кого-что* тауыш биреү; **ка́ждый избира́тель голосу́ет ли́чно** һәр һайлаусы үҙе тауыш бирә **2.** *что* тауышҡа ҡуйыу **3.** *разг.* ҡул күтәреү; **голосова́ть на доро́ге** юлда ҡул күтәреү (*машина һ.б. туҡтатыу өсөн*)

**ГОЛОСОВО́Й,** -ая, -ое тауыш ...ы; **голосово́й аппара́т** тауыш аппараты; **голосовы́е свя́зки** тауыш ярылары; **голосова́я щель** тауыш ярыларындағы ярыҡ

**ГОЛУБЕВО́ДСТВО** *с* күгәрсен аҫрау (үрсетеү)

**ГОЛУБЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*виднеться — о чём-л. голубом*) күгелйемләнеп (зәңгәрләнеп) күренеү **2.** (*становиться голубым*) күгелйемләнеү, зәңгәрләнеү; **не́бо голубе́ло** күк зәңгәрләнде

**ГОЛУБИЗНА́** *ж* зәңгәрлек; **небе́сная голубизна́** күк йөҙө зәңгәрлеге

**ГОЛУБИ́КА** *ж* күк көртмәле

**ГОЛУБИ́НЫЙ,** -ая, -ое күгәрсен ...ы; **голуби́ное яйцо́** күгәрсен йоморҡаһы; **голуби́ная по́чта** күгәрсен почтаһы

**ГОЛУ́БИТЬ** *несов. кого-что*; *поэт.* иркәләү

**ГОЛУ́БКА** *ж* **1.** инә күгәрсен **2.** *разг.* күгәрсенкәй (*катын-ҡыҙға иркәләп өндәшеү һүҙе*)

**ГОЛУБОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое зәңгәр күҙле; **голубогла́зый ма́льчик** зәңгәр күҙле малай

**ГОЛУБО́Й,** -ая, -ое зәңгәр, күк; **голубы́е глаза́** зәңгәр күҙҙәр; **голубо́е не́бо** зәңгәр күк ♦ **голуба́я кровь** ғали зат, аҡһөйәк; **голубо́й песе́ц** күк төлкө; **голубо́й экра́н** зәңгәр экран

**ГОЛУБЦЫ́** *мн.* (*ед.* **голубе́ц** *м*) голубцы (*кәбеҫтәгә төрөп бешерелгән ит, дөгө ашамлығы*)

**ГОЛУ́БЧИК** *м*; *разг.* күгәрсенем, иркәм, ҡәҙерлем (*ир кешегә ҡарата*); **голу́бка** *ж* күгәрсенкәй (*ҡатын-ҡыҙға ҡарата*)

**ГО́ЛУБЬ** *м* күгәрсен; **голу́бка** *ж* инә күгәрсен; **ди́кий го́лубь** ҡыр күгәрсене ♦ **го́лубь ми́ра** тыныслыҡ күгәрсене

**ГОЛУБЯ́ТИНА** *ж* күгәрсен ите

**ГОЛУБЯ́ТНИК** *м* **1.** күгәрсен аҫраусы, күгәрсен тотоусы **2.** (*ловчая птица*) күгәрсен типкес (*йыртҡыс ҡош*) **3.** *разг. см.* **голубя́тня**

**ГОЛУБЯ́ТНЯ** *ж* күгәрсен кетәге

**ГО́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** яланғас, шәрә; **го́лые но́ги** ялanғас аяҡ **2.** (*лишённый растительности*) ҡола, ялanғас, шәрә, таҡыр; **го́лая степь** ҡола дала; **го́лое де́рево** шәрә ағас; **го́лая голова́** таҡыр баш **3.** (*ничем не покрытый*) ҡаҡ; **спать на го́лом полу́** ҡаҡ иҙәндә йоҡлау **4.** *прям.*, *перен.*; *разг.* ҡоро; **го́лые фа́кты** ҡоро факттар; **го́лые ци́фры** ҡоро һандар **5.** *перен.* ап-асыҡ, асыҡтан-асыҡ; **го́лая и́стина** ап-асыҡ хәҡиҡәт; **го́лое любопы́тство** асыҡтан-асыҡ ҡыҙыҡһыныу ♦ **го́лая соль** шау тоҙ; **го́лые сте́ны** буш стеналар; **брать (взять) го́лыми рука́ми** анһат ҡына ҡулға төшөрөү; **гол как соко́л** ауыҙын аса, үпкәһе күренә

**ГОЛЫ́Ш** *м* **1.** *разг.* шәрә бала, шәрә кеше **2.** (*гладкий камень*) шыма йомро таш

**ГОЛЫШО́М** *нареч.*; *разг.* ялanғас (шәрә) килеш; **бе́гать голышо́м** шәрә килеш йүгереп йөрөү

**ГОЛЬЁ** *с*; *спец.* **1.** (*части мясной туши*) башы-эсәге (*баш-аяҡ, үпкә-бауыр, эсәктәр*) **2.** (*кожа*) ейелгән тире

**ГОЛЬФ** *м* гольф (*АҠШ-та, Англияла һ.б. илдәрҙә таралған сәкән менән туп һуғыу уйыны*) ♦ **брю́ки гольф** гольф салбар (*балағы тубыҡтан түбән эленә торған ҡыҫҡа салбар*); **носки́ гольф**; **чулки́ гольф** гольф ойоҡ (*ҡунысы тубыҡҡа ҡәҙәр*)

**ГОМЕОПА́Т** *м* гомеопат (*табип*)

**ГОМЕОПАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое гомеопатия ...ы; **гомеопати́ческая апте́ка** гомеопатия дарыуханаһы; **гомеопати́ческие сре́дства** гомеопатия саралары

**ГОМЕОПА́ТИЯ** *ж* гомеопатия (*ауырыта торған дарыуҙарҙы сирлегә аҙлап биреп, һауыҡтырыу ысулы*)

**ГОМЕРИ́ЧЕСКИЙ: гомери́ческий смех (хо́хот)** тыйыла алмай көлөү, шарҡылдап көлөү

**ГО́МОН** *м*; *разг.* шау-шыу, сыр-сыу; **пти́чий го́мон** ҡоштар сыр-сыуы

**ГОМОНИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* сыр-сыу килеү

**ГОМОСЕКСУАЛИ́ЗМ** *м* гомосексуализм (*бер енестәге кешеләрҙең бер-беренә тәбиғи булмаған енси ынтылышы*)

**ГОН** *м* **1.** *см.* **гнать, гна́ться** 1; **2.** *охот.* эҙәрлекләү (*ауҙа*) **3.** *спец.* (*состояние зверей в брачный период*) ҡауышыу, ҡарығыу; **гон волко́в** бүреләр ҡарығыуы

**ГОНГ** *м* гонг (*музыка ҡоралы, сигнал биреү өсөн дә ҡулланыла*); **уда́рить в гонг** гонг һуғыу; **прозвуча́л гонг** гонг яңғыраны

**ГОНДО́ЛА** *ж* гондола (**1.** *яҫы төплө, мороно менән ҡойроғо бейек итеп эшләнгән, пассажирҙар өсөн, ғәҙәттә, каютаһы йәки япмаһы булған бер ишкәкле Венеция кәмәһе* **2.** *һауа шарының кеше ултыра торған кәрзине һәм дирижаблдә йәки аэростатта кеше, төрлө ҡорамал урынлашҡан урын* **3.** *т. юл. йөктө бушатыу өсөн төбө асылмалы, түбәһеҙ вагон*)

**ГОНДОЛЬЕ́Р** *м* гондольер (*гондола иш-кәксеһе*)

**ГОНЕ́НИЕ** *с* эҙәрләү, эҙәрлекләү; **подве́ргнуться гоне́ниям** эҙәрлекләүгә дусар ителеү (булыу)

**ГОНЕ́Ц** *м* сапҡын, атсабар; **посла́ть гонца́** сапҡын ебәреү

**ГОНИ́ТЕЛЬ** *м* эҙәрләүсе, йәберләүсе, ҡыҫыусы

**ГО́НКА** *ж* **1.** *см.* **гнать, гна́ться; гоня́ть, гоня́ться 2.** *разг.* (*спешка*) ҡабаланыу, ашығыслыҡ; **пе́ред отъе́здом начала́сь го́нка** китер алдынан ашығыслыҡ башланды **3.** *мн.* **го́нки** уҙыш, ярыш; **автомоби́льные го́нки** автомобилдәр уҙышы; **лы́жные го́нки** саңғы ярышы ♦ **го́нка вооруже́ний** ҡыҙыу ҡоралланыу

**ГО́НКИЙ,** -ая, -ое *охот.* йүгерек; **го́нкая борза́я** йүгерек бурҙай

**ГОНОКО́КК** *м*; *мед.* гонококк (*гонорея микробы*)

**ГО́НОР** *м* һауалылыҡ, маһайыусанлыҡ, эрелек, тәкәбберлек; **челове́к с го́нором** тәкәббер кеше

**ГОНОРА́Р** *м* гонорар (*яҙыусы, рәссам һ.б. ижадсы кешеләрҙең хеҙмәтенә килешеү буйынса түләнә торған аҡсалата эш хаҡы*); **а́вторский гонора́р** автор гонорары; **получи́ть гонора́р** гонорар алыу

**ГОНОРА́РНЫЙ,** -ая, -ое гонорарлы; **гонора́рная статья́** гонорарлы мәҡәлә; **гонора́рное изда́ние словаря́** һүҙлектең гонорарлы баҫмаһы

**ГОНОРЕ́Я** *ж*; *мед.* гонорея (*гонококтан барлыҡҡа килеп, бәүел юлын эренләтә торған венерик ауырыу*)

**ГО́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое уҙышыу ...ы, ярыш ...ы; **го́ночный автомоби́ль** уҙышыу автомобиле; **го́ночная ло́дка** уҙышыу кәмәһе

**ГОНТ** *м собир.* гонт (*бер сите йоҡа итеп юнылып, икенсеһе ырмаулап, нәҙек таҡта рәүешендә эшләнгән түбә ябыу материалы*)

**ГОНТОВО́Й,** -ая, -ое гонтлы, гонт менән ябылған; **гонтова́я кры́ша** гонт менән ябылған түбә

**ГОНЧА́К** *м*; *охот.* эҙәрлекләүсе (тазы) эт

**ГОНЧА́Р** *м* көршәксе

**ГОНЧА́РНИЧАТЬ** *несов.* көршәк яһау менән шөғөлләнеү

**ГОНЧА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көршәк яһау ...ы; **гонча́рное иску́сство** көршәк яһау сәнғәте **2.** балсыҡ, балсыҡтан яһалған; **гонча́рные изде́лия** балсыҡтан яһалған нәмәләр

**ГО́НЧАЯ** *ж*; *охот.* тазы (эҙәрлекләүсе) эт

**ГО́НЩИК** *м*; *спорт.* уҙышсы, уҙышта ҡатнашыусы; **го́нщик-мотоцикли́ст** уҙышсы мотоциклист

**ГОНЬБА́** *ж см.* **гон** 1, 2

**ГОНЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **гнать 2.** *кого*; *разг.* (*посылать*) йүгертеү, йөрөтөү; **гоня́ть ребёнка с поруче́ниями** баланы йомош менән йүгертеү, (*заставлять отвечать по разным частям учебной программы*) буйынса ҡыуыу (һорау); **гоня́ть по всему́ ку́рсу** бөтә үтелгән курс буйынса ҡыуыу ♦ **ло́дыря гоня́ть** ел ҡыуыу, эт һуғарыу (*буш йөрөү*)

**ГОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **гна́ться** 1, 2; **2.** *за кем-чем*; *разг.* йөрөү, сабыу; **гоня́ться за ре́дкими кни́гами** һирәк осрай торған китаптар артынан йөрөү ♦ **гоня́ться за двумя́ за́йцами** ике кәмә ҡойроғон тотоу

**ГОП** *межд.* һоп ♦ **не говори́ гоп, пока́ не перепры́гнешь** алдан ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта

**ГОПА́К** *м* гопак (*украин халыҡ бейеүе һәм шуның көйө*)

**ГОПЛЯ́** *межд. см.* **гоп**

**ГОРА́** *ж* **1.** тау; **Ура́льские го́ры** Урал тауҙары; **ледяна́я гора́** боҙ тауы; **ката́ться с горы́** тауҙан шыуыу **2.** *мн.* **го́ры** (*горная местность*) тауҙар, таулы урын; **жить в гора́х** таулы урында йәшәү **3.** *чего, из чего* (*множество*) тау-тау, өйөм-өйөм, бик күп; **го́ры книг** өйөм-өйөм китап; **во дворе́ лежа́т го́ры я́щиков** ишек алдында тау-тау йәшниктәр ята ♦ **гора́ с плеч (свали́лась)** өҫтән тау төшкәндәй булды; **не за гора́ми** артыҡ алыҫ түгел, яҡында; **в го́ру идти́ (поднима́ться)** юғары күтәрелеү, эш-хәл шәпкә китеү, уңыштарға ирешеү; **по́д гору идти́ (кати́ться и т.п.)** түбән төшөү, кирегә китеү (*уңышһыҙлыҡтарға осрау*); **как на ка́менную го́ру наде́яться** *на кого-что* бик ныҡ ышаныу; **пир горо́й** мул һый, хан туйы; **стоя́ть (встать, стать) горо́й** *за кого-что* кемдер (ниҙер) өсөн ныҡ тороу, кемделер (ниҙелер) үлеп яҡлашыу; **сули́ть (обеща́ть) золоты́е го́ры** алтын тауҙар вәғәҙә итеү

**ГОРА́ЗД** *на что, в чём в знач. сказ., с неопр.*; *прост.* оҫта, булдыра; **врать гора́зд** алдауға оҫта; **на вы́думки гора́зд** төрлө нәмә уйлап сығарыуға оҫта ♦ **кто во что гора́зд** кем нисек булдыра ала, һәр береһе үҙенсә

**ГОРА́ЗДО** *нареч.* байтаҡ, шаҡтай, күп; **он гора́здо вы́ше бра́та** ул ағаһынан байтаҡ бейек; **здесь гора́здо просто́рнее** бында шаҡтай иркен

**ГОРБ** *м* **1.** бөкрө, көмрө; **горб на спине́** арҡалағы бөкрө **2.** (*у верблюдов*) үркәс; **верблю́жий горб** дөйә үркәсе **3.** (*на плоскости*) көмрө; **сострога́ть горб на доске́** таҡтаның көмрөһөн йышып алыу ♦ **свои́м горбо́м (добыва́ть, зараба́тывать и т.п.)** үҙ елкәһе менән, үҙенең ҡул көсө менән (табыу); **испыта́ть на своём горбу́** үҙ елкәһендә татыу

**ГОРБА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) бөкрө, көмрө; **горба́тый челове́к** бөкрө кеше **2.** (*изогнутый*) көмрө, кәкре; **горба́тый мост** көмрө күпер; **горба́тый нос** көмрө танау **3.** *в знач. сущ.* **горба́тый** *м* и **горба́тая** *ж* бөкрө, көмрө

**ГОРБИ́НКА** *ж* көмрө, кәкре; **нос с горби́нкой** көмрө танау

**ГО́РБИТЬ** *несов. что* бөкрәйтеү, көмрәйтеү, кәкрәйтеү; **го́рбить спи́ну** арҡа көмрәйтеү

**ГО́РБИТЬСЯ** *несов.* бөкрәйеү, көмрәйеү; **го́рбиться при ходьбе́** бөкрәйеп йөрөү

**ГОРБОНО́СЫЙ,** -ая, -ое көмрө танаулы

**ГОРБУ́Н** *м* и **ГОРБУ́НЬЯ** *ж* бөкрө, көмрө

**ГОРБУ́ША** *ж* горбуша, көмрө балыҡ

**ГОРБУ́ШКА** *ж* ҡыйыр, ҡыйырсыҡ; **отре́зать горбу́шку от кру́глого ржано́го хле́ба** түңәрәк арыш икмәгенән ҡыйырсыҡ телеп алыу

**ГОРБЫ́ЛЬ** *м* гәрбил, таҡта ҡыртышы; **берёзовый горбы́ль** ҡайын гәрбиле

**ГОРДЕЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое эре, тәкәббер, маһайыусан, ғорур; **гордели́вая оса́нка** ғорур һын

**ГОРДЕ́Ц** *м* һауалы (эре) ир-ат; **гордя́чка** *ж*; *разг.* һауалы (эре) ҡатын-ҡыҙ

**ГО́РДИЕВ: го́рдиев у́зел** сисә алмаçлыҡ мәсьәлә, буталсыҡ эш-хәл

**ГОРДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *кем-чем* ғорурланыу, маҡтаныу; **горди́ться успе́хами** уңыштар менән ғорурланыу **2.** *разг.* (*быть высокомерным*) тәкәбберләнеү, эреләнеү, танау сөйөү

**ГО́РДОСТЬ** *ж* **1.** ғорурлыҡ; **мужска́я го́рдость** ирҙәр ғорурлығы; **говори́ть с го́рдостью** ғорурлыҡ менән һөйләү; **испы́тывать го́рдость** ғорурлыҡ тойоу **2.** *чья* ғорурлыҡ; **э́тот студе́нт— го́рдость институ́та** был студент — институттың ғорурлығы **3.** (*высокомерие*) һауалылыҡ, эрелек; **обвини́ть в го́рдости** *кемделер* һауалылыҡта ғәйепләү

**ГО́РДЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғорур; **го́рдый челове́к** ғорур кеше; **го́рдый взгляд** ғорур ҡараш **2.** *перен.* мәғрур; **го́рдые со́сны** мәғрур ҡарағайҙар **3.** *перен.* (*возвышенный*) бөйөк, илаһи; **го́рдые мечты́** бөйөк хыялдар **4.** (*высокомерный*) һауалы, эре

**ГО́РЕ** *с* **1.** ҡайғы, хәсрәт, зар; **дели́ть го́ре и ра́дость** ҡайғыны һәм шатлыкты уртаҡлашыу; **жить в го́ре** хәсрәт эсендә йәшәү; **говори́ть о своём го́ре** үҙ зарыңды һөйләү **2.** (*несчастье*) бәхетһеҙлек, бәлә-ҡаза ♦ **го́ре го́рькое** ҡара ҡайғы; **и го́ря ма́ло** *кому* иçе лә китмәй; ике ятып, бер төшөнә лә инмәй; **с го́рем попола́м** көс-хәл менән

**ГО́РЕ-...** *ирон.* йорат, шәрәмәт; **го́ре-рыба́к** балыҡсы шәрәмәте; **го́ре-руководи́тель** етәксе йораты

**ГОРЕВА́ТЬ** *несов.* ҡайғырыу, хәсрәтләнеү, көйөнөү; **си́льно горева́ть** ныҡ ҡайғырыу; **не горю́й** ҡайғырма

**ГОРЕ́ЛКА** *ж* горелка (*газ плитаһында һ.б.*); **сва́рочная горе́лка** иретеп йәбештереү горелкаһы

**ГОРЕ́ЛКИ** *мн.* әбәк-көбәк; **игра́ть в горе́лки** әбәк-көбәк уйнау

**ГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** янған, көйгән, ҡыҙған; **горе́лая ко́рка** көйгән ҡыртыш; **горе́лый лес** янған урман; **горе́лый хлеб** ҡыҙған ашлыҡ **2.** *спец.* серегән, бурһыған; **горе́лая ко́жа** серегән күн **3.** *в знач. сущ.* **горе́лое** *с* көйөк; **па́хнет горе́лым** көйөк еçе килә

**ГОРЕЛЬЕ́Ф** *м* горельеф (*яçылыҡ өçтөнә күләменең яртыһынан күберәге ҡалҡыу итеп яһалған һын*)

**ГОРЕМЫ́КА** *м* и *ж*; *разг.* әҙәм имгәге, хәсрәт тоҡсайы

**ГОРЕМЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бәхетһеҙ, бисара, ҡайғы-хәсрәтле; **горемы́чное житьё** ҡайғы-хәсрәтле тормош; **горемы́чный челове́к** бәхетһеҙ кеше

**ГО́РЕСТНЫЙ,** -ая, -ое ҡайғылы, хәсрәтле, зарлы; **го́рестная весть** ҡайғылы хәбәр; **го́рестные мину́ты** ҡайғылы минуттар; **го́рестное лицо́** хәсрәтле йөҙ

**ГО́РЕСТЬ** *ж* **1.** (*скорбь*) ҡайғы, хәсрәт **2.** *мн.* **го́рести** ҡайғы-хәсрәт, бәхетһеҙлек; **пережи́ть мно́го го́рестей** күп ҡайғы-хәсрәт кисереү

**ГОРЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *в разн. знач.* яныу; **дрова́ хорошо́ горя́т** утын яҡшы яна; **ма́сло гори́т на сковороде́** табалағы май яна; **ла́мпочка гори́т** лампочка яна; **всё те́ло гори́т от высо́кой температу́ры** юғары температуранан бөтә тән яна **2.** *разг.* яныу, юҡка сығыу; **план гори́т** план яна; **путёвка гори́т** путёвка яна **3.** яныу, балҡыу; **звёзды горя́т на ночно́м не́бе** төнгө күк йөҙөндә йондоҙҙар балҡый; **глаза́ его́ горя́т от ра́дости** шатлыҡтан күҙҙәре яна **4.** яныу, ҡыҙарыу; **у́ши горя́т** ҡолаҡтар ҡыҙара **5.** (*преть, гнить*) яныу, ҡыҙыу; **зерно́ в ларе́ на́чало горе́ть** әрйәлә ашлыҡ ҡыҙа башланы **6.** *обычно чем* яныу, бик ныҡ теләү; **горе́ть любо́вью** ғишыҡ утында яныу; **горе́ть жела́нием** теләк менән яныу **7.** *на ком-чём*; *разг.* (*быстро изнашиваться*) тетелеү, тиҙ туҙыу ♦ **душа́ (се́рдце) гори́т** йөрәк яна; **рабо́та гори́т в рука́х** *у кого* ҡулына күҙ эйәрмәй; **земля́ гори́т под нога́ми** *у кого* ҡайҙа баçырға урын тапмай (*ауыр хәлгә ҡалыу хаҡында*); **не гори́т** ашығыс түгел

**ГО́РЕЦ** *м* и **ГОРЯ́НКА** *ж* таулы, тауҙа йәшәүсе (*кеше*)

**ГОРЕ́Ц** *м* ҡымыҙлыҡ; **горе́ц змеи́ный** йылан тамыр ҡымыҙлығы

**ГО́РЕЧЬ** *ж* **1.** әсе, әсе тәм; **го́речь полы́ни** әрем әсеһе; **ощути́ть го́речь во рту** ауыҙҙа әсе тәм тойоу **2.** (*чувство*) әсенеү, йөрәк әрнеше; **го́речь утра́ты** юғалтыуҙан әсенеү, юғалтыу ауырлығы

**ГОРЕЧА́ВКА** *ж* бабасыр уты

**ГОРИЗО́НТ** *м* **1.** *в разн. знач.* офоҡ, күк йөҙө; **со́лнце скры́лось за горизо́нтом** ҡояш офоҡ артына йәшеренде; **весь горизо́нт закры́т густы́ми ту́чами** күк йөҙө ҡуйы болоттар менән ҡапланған; **откры́ть но́вые горизо́нты в нау́ке** фәндә яңы офоҡтар асыу; **тво́рческие горизо́нты** ижа-

ди офоҡтар **2.** *геол.* горизонт; **горизо́нт воды́** һыу горизонты; **нефтено́сный горизо́нт** нефтле горизонт ♦ **появи́ться на горизо́нте** килеп сығыу, күренә башлау (*кеше араһында*); **исче́знуть с горизо́нта** *чьего* юҡ булыу, күренмәй башлау

**ГОРИЗОНТА́ЛЬ** *ж* горизонталь; **по горизонта́ли** горизонталь буйынса

**ГОРИЗОНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое горизонталь; **горизонта́льная ли́ния** горизонталь һыҙыҡ; **горизонта́льная пло́скость** горизонталь яҫылыҡ

**ГОРИ́ЛЛА** *ж* горилла (*кешегә оҡшаш иң эре маймыл*)

**ГОРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое таулы; **гори́стая ме́стность** таулы урын

**ГОРИХВО́СТКА** *ж* ҡыҙылғойроҡ

**ГОРИЦВЕ́Т** *м* умырзая; **горицве́т весе́нний** яҙғы умырзая; **горицве́т кра́сный** ҡыҙыл умырзая

**ГО́РКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **гора́** 1, 3; **2.** горка (*һауыт-һаба шкафы*)

**ГО́РКНУТЬ** *несов.* әсеү, әсе тәм инеү

**ГОРКО́М** *м* (*городской комитет*) горком (*ҡала комитеты*)

**ГОРЛА́НИТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *прост.* аҡырыу, аҡырып йырлау, ҡысҡырып йырлау (һөйләшеү һ.б.)

**ГОРЛА́СТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* әсе тауышлы, аҡырыусан, ларылдаҡ; **горла́стый пету́х** әсе тауышлы әтәс; **горла́стый челове́к** ларылдаҡ кеше

**ГО́РЛИНКА** и **ГО́РЛИЦА** *ж* алатуба, урман күгәрсене

**ГО́РЛО** *с* **1.** тамаҡ, боғаҙ; **в го́рле пересо́хло** тамаҡ кипте; **боле́зни го́рла** тамаҡ ауырыуҙары; **кровь идёт го́рлом** боғаҙҙан ҡан килә **2.** (*у сосуда*) ауыҙ, муйын; **го́рло буты́лки** шешә ауыҙы **3.** (*устье*) тамаҡ; **го́рло зали́ва** ҡултыҡ тамағы ♦ **дыха́тельное го́рло** *анат.* ҡурылдай, боғарлаҡ; **по го́рло** муйындан; **дел по го́рло** эш муйындан; **поперёк го́рла стать (встать и т.п.)** тамаҡҡа таш булып (арҡыры) тороу; **взять (брать, схвати́ть) за го́рло** алҡымдан алыу; **наступи́ть на го́рло** *кому* алҡымға йәбешеү; **во всё го́рло (крича́ть, петь и т.п.)** тамаҡ ярылғансы, тамаҡ ярып (йыртып) (ҡысҡырыу, йырлау һ.б.); **приста́ть с ножо́м к го́рлу** тамаҡҡа бысаҡ терәү (*ниҙер талап итеү*); **сыт по го́рло**: 1) бик туҡ, бер ҡабыр урын юҡ; 2) *чем* туйҙырған, артығы менән еткән; **по го́рло сыт приключе́ниями** мажаралар (баштан үткәндәр) артығы менән еткән

**ГОРЛОВИ́НА** *ж* **1.** ауыҙ (*тарая барған тәрән тишек*); **горлови́на вулка́на** вулкан ауыҙы; **горлови́на парово́го котла́** пар ҡаҙанының ауыҙы **2.** (*узкий проход*) үҙәк; **горлови́на реки́** йылға үҙәге

**ГОРЛОВО́Й,** -ая, -ое тамаҡ …ы; **горлова́я боле́знь** тамаҡ ауырыуы

**ГО́РЛЫШКО** *с* **1.** *уменьш.-ласк. от* **го́рло** 1; **2.** (*у сосуда*) ауыҙ; **го́рлышко буты́лки** шешә ауыҙы

**ГОРМО́Н** *м*; *физиол.* гормон (*эске секреция биҙҙәре эшләп сығара торған матдә*); **гормо́ны щитови́дной железы́** ҡалҡан биҙ гормондары

**ГОРМОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *физиол.* **1.** гормональ, гормон …ы; **гормона́льное вещество́** гормональ матдә, гормон матдәһе **2.** гормонлы; **гормона́льный препара́т** гормонлы препарат

**ГОРН I** *м* **1.** (*печь*) усаҡ; **кузне́чный горн** тимерлек усағы **2.** горн (*домна мейесенең аҫҡы өлөшө*)

**ГОРН II** *м* борғо; **пионе́рский горн** пионер борғоһо

**ГОРНИ́СТ** *м* борғосо

**ГО́РНИЧНАЯ** *ж* хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ; **го́рничная в гости́нице** ҡунаҡханалағы хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ

**ГОРНОВО́Й** *м* горновой (*домналағы эшсе*)

**ГОРНОЗАВО́ДСКИЙ,** -ая, -ое тау сәнәғәте …ы, тау заводы …ы; **горнозаво́дский райо́н** тау сәнәғәте районы

**ГОРНОЗАВО́ДЧИК** *м* горнозаводчик, тау заводы хужаһы

**ГОРНОЛЫ́ЖНИК** *м* и **ГОРНОЛЫ́ЖНИЦА** *ж* тау саңғысыһы

**ГОРНОЛЫ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тау саңғыһы …ы; **горнолы́жная ба́за** тау саңғыһы базаһы; **горнолы́жный спорт** тау саңғыһы спорты

**ГОРНОПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое тау сәнәғәте …ы; **горнопромы́шленный райо́н** тау сәнәғәте районы

**ГОРНОРАБО́ЧИЙ** *м* тау эшсеһе, тау сәнәғәте эшсеһе

**ГОРНОРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое тау тоҡомдары …ы; **горнору́дные предприя́тия** тау тоҡомдарын эшкәртеү предприятиелары

**ГОРНОСПАСА́ТЕЛЬ** *м* тау эштәрендә ҡотҡарыусы

**ГОРНОСТА́ЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҫ …ы; **горноста́евый мех** аҫ тиреһе **2.** аҫ; **горноста́евый воротни́к** аҫ яға

**ГОРНОСТА́Й** *м* **1.** аҫ; **детёныш горноста́я** аҫ балаһы **2.** (*мех*) аҫ тиреһе; **обши́тая горноста́ем ша́пка** аҫ тиреһе менән тышланған бүрек

**ГО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* тау …ы; **го́рные верши́ны** тау түбәләре; **го́рный ключ** тау шишмәһе; **го́рные лы́жи** тау саңғыһы; **го́рный орёл** тау бөркөтө; **го́рные поро́ды** тау тоҡомдары; **го́рные рабо́ты** тау эштәре **2.** таулы; **го́рная страна́** таулы ил ♦ **го́рный лён** тау етене (*асбест төрө*); **го́рный хруста́ль** тау гәлсәре (*кварцтың үтә күренмәле төрө*)

**ГОРНЯ́К** *м* горняк, таусы (**1.** *тау сәнәғәте эшсеһе* **2.** *тау инженерҙары йәки таусылар әҙерләгән уҡыу йорто студенты*)

**ГОРНЯ́ЦКИЙ,** -ая, -ое горняктар ...ы, таусылар ...ы; **горня́цкий посёлок** таусылар ҡасабаһы

**ГО́РОД** *м* **1.** ҡала; **областно́й го́род** өлкә ҡалаһы; **жить за́ городом** ҡала ситендә йәшәү **2.** *ист.* ҡәлғә ♦ **ни к селу́ ни к го́роду** урынһыҙға, тейешһеҙгә

**ГО́РОД-ГЕРО́Й** *м* герой ҡала

**ГОРОДИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* һөйләү; **глу́пости городи́ть** ахмаҡ һүҙ һөйләү; **городи́ть чепуху́** юҡ-барҙы һөйләү ♦ **огоро́д городи́ть** юҡҡа маташыу, файҙаһыҙ эш менән булыу

**ГОРОДИ́ЩЕ** *с*; *археол.* ҡаласыҡ; **раска́пывать городи́ще** ҡаласыҡты ҡаҙыу

**ГОРОДКИ́** *мн.* (*ед.* **городо́к** *м*) бура; **игра́ть в городки́** бура һуғыу

**ГОРОДНИ́ЧИЙ** *м*; *ист.* ҡала башлығы

**ГОРОДОВО́Й** *м*; *ист.* городовой (*революцияға тиклем Рәсәйҙә ҡала полицияһындағы түбән дәрәжә*)

**ГОРОДО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **го́род** 1; **2.** ҡаласыҡ; **вое́нный городо́к** хәрби ҡаласыҡ; **студе́нческий городо́к** студент ҡаласығы

**ГОРОДО́ШНИК** *м* бура һуғыусы (уйынсы)

**ГОРОДО́ШНЫЙ,** -ая, -ое бура һуғыу ...ы; **городо́шный спорт** бура һуғыу спорты; **городо́шная площа́дка** бура һуғыу майҙансығы

**ГОРОДСКО́Й,** -ая, -ое ҡала ...ы; **городска́я у́лица** ҡала урамы; **городско́й тра́нспорт** ҡала транспорты

**ГОРОЖА́НИН** *м* и **ГОРОЖА́НКА** *ж* ҡала кешеһе, ҡалала йәшәүсе

**ГОРОСКО́П** *м* гороскоп, йондоҙнамә (*берәйһенең яҙмышы йәки ниндәйҙер ваҡиғаның ни менән бөтөүен алдан әйтеү өсөн астрологтар тарафынан йондоҙҙарҙың урынлашыу тәртибенән сығып төҙөлгән таблица*)

**ГОРО́Х** *м* борсаҡ ♦ **как об сте́ну (сте́нку) горо́х** ҡолағына ла элмәй, уға әйттең ни ҙә әйтмәнең ни; **при царе́ Горо́хе** *шутл.* хан заманында, бик күптән

**ГОРО́ХОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** борсаҡ ...ы; **горо́ховый стручо́к** борсаҡ ҡуҙағы; **горо́ховый суп** борсаҡ ашы **2.** (*о цвете*) борсаҡ төҫлө, һорғолт һары; **горо́ховый пиджа́к** һорғолт һары пинжәк ♦ **чу́чело горо́ховое**; **шут горо́ховый** әҙәм көлкөһө (мәсхәрәһе)

**ГОРО́ШЕК** *м* **1.** *уменьш. от* **горо́х** **2.** (*крапинка на материи*) бөрсөк; **ткань в горо́шек** бөрсөклө туҡыма ♦ **зелёный горо́шек** йәшел борсаҡ

**ГОРО́ШИНА** *ж* **1.** (бер) борсаҡ, борсаҡ бөртөгө **2.** *см.* **горо́шек** 2

**ГОРО́ШИНКА** *ж*; *уменьш. от* **горо́шина**

**ГО́РСКИЙ,** -ая, -ое таулы ...ы; **го́рская дере́вня** таулылар ауылы; **го́рские племена́** таулылар ҡәбиләләре

**ГОРСОВЕ́Т** *м* ҡала советы

**ГО́РСТКА** *ж*; *разг. см.* **горсть**

**ГО́РСТОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **горсть**

**ГОРСТЬ** *ж* **1.** ус; **зачерпну́ть го́рстью воды́** усҡа һыу алып һирпеү **2.** *чего* бер ус; **горсть со́ли** бер ус тоҙ **3.** бер төркөм; **горсть храбрецо́в** бер төркөм батырҙар

**ГОРТА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тамаҡ ...ы; **горта́нные мы́шцы** тамаҡ мускулдары; **горта́нные согла́сные** *лингв.* тамаҡ төбө тартынҡылары **2.** тамаҡ төбө менән; **слы́шался горта́нный го́вор** тамаҡ төбө менән һөйләшеү ишетелә ине

**ГОРТА́НЬ** *ж*; *анат.* тамаҡ

**ГОРЧИ́ТЬ** *несов.* әсе тәм килеү, күкһегән тәм килеү; **ма́сло горчи́т** майҙан күкһегән тәм килә

**ГОРЧИ́ЦА** *ж* гәрсис (*үҫемлек һәм шул үҫемлектән әҙерләнә торған аш тәмләткес*)

**ГОРЧИ́ЧНИК** *м* горчичник; **поста́вить горчи́чник** горчичник ҡуйыу

**ГОРЧИ́ЧНИЦА** *ж* гәрсис һауыты

**ГОРЧИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое гәрсис ...ы; **горчи́чное ма́сло** гәрсис майы

**ГОРШЕ́ЧНИК** *м* көршәксе, көршәк яһаусы (*оҫта*)

**ГОРШО́К** *м* көршәк, сүлмәк; **цвето́чный горшо́к** сәскә көршәге ♦ **от горшка́ два вершка́** ҡарыш буйы (*бала йәки буйға бик бәләкәй кеше*)

**ГО́РЬКИЙ,** -ая, -ое **1.** әсе, асы; **го́рький вкус** әсе тәм; **го́рькое лека́рство** әсе дарыу **2.** әсе, асы, аянослы; **го́рькая пра́вда** әсе хәҡиҡәт; **го́рькая до́ля** аянослы яҙмыш; **го́рькая усме́шка** әсе йылмайыу; **го́рькие слёзы** әсе күҙ йәше **3.** *разг.* (*несчастный*) ҡыҙғаныс, бәхетһеҙ; **го́рькая сирота́** ҡыҙғаныс йәтим (етем) ♦ **го́рькие во́ды** әсе һыуҙар, минераль һыуҙар; **го́рький (го́рькая) пья́ница** эскесе, сәрхүш, иҫерек баш, мәйхур; **пить го́рькую** туҡтауһыҙ эсеү

**ГО́РЬКО** **1.** *нареч. см.* **го́рький** 1, 2; **го́рько пла́кать** әсе күҙ йәше менән илау, зар илау; **го́рько па́хнет полы́нью** әсе эрем еҫе аңҡый **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* әсе, әсе тәм; **во рту го́рько от со́ли** ауыҙҙа тоҙҙан әсе тәм **3.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* ауыр, аяныс; **мне го́рько, что он не понима́ет э́того** уның был хәлде аңламауынан миңә ауыр ♦ **го́рько!** әсе! (*туй табынында ҡунаҡтарҙың яңы өйләнешкәндәрҙе үбешергә саҡырыу ауазы*)

**ГОРЮ́ЧИЙ I,** -ая, -ее **1.** яныусан, яна торған; **горю́чий газ** яна торған газ; **горю́чая жи́дкость** яна торған шыйыҡлыҡ **2.** *в знач. сущ.* **горю́чее** *с* яғыулыҡ

**ГОРЮ́ЧИЙ II: горю́чие слёзы** *трад.-поэт.*, *разг.* әсе күҙ йәше

**ГОРЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡайнар, эҫе, ҡыҙыу; **горя́чая вода́** ҡайнар һыу; **горя́чий ча́йник** эҫе

сэйнүк; **горя́чие ру́ки** эҫе ҡулдар; **горя́чее со́лнце** ҡыҙыу ҡояш **2.** *перен.* ҡыҙыу, ҡайнар, ялҡынлы; **горя́чая голова́** ҡыҙыу баш; **горя́чая любо́вь** ҡайнар һөйөү; **горя́чий приве́т** ҡайнар сәләм **3.** *перен.* ҡыҙыу; **горя́чий челове́к** ҡыҙыу кеше; **горя́чая пора́** ҡыҙыу ваҡыт; **горя́чая рабо́та** ҡыҙыу эш; **горя́чий разгово́р** ҡыҙыу һөйләшеү **4.** *перен.* (*о лошадях*) ярһыу, иләү **5.** ҡыҙҙырып, эҫетеп; **горя́чая вулканиза́ция** ҡыҙҙырып вулканизациялау; **горя́чая обрабо́тка мета́ллов** металды ҡыҙҙырып эшкәртеү; **горя́чее копче́ние** эҫетеп ыҫлау **6.** *в знач. сущ.* **горя́чее** *с*; *разг.* эҫе аш ♦ **горя́чая кровь** *у кого* ҡыҙыу ҡанлы; **по горя́чим следа́м**: 1) (*по свежим следам*) эҙе һыуынмаҫ элек, артынса уҡ тикшереү (эҙәрләү); 2) (*сразу же*) эҫе мәлендә; **под горя́чую ру́ку (попа́сть, подверну́ться и т.п.)** ҡыҙған саҡҡа (тура килеү, эләгеү)

**ГОРЯЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* иҫерткес; **горячи́тельные напи́тки** иҫерткес эсемлектәр

**ГОРЯЧИ́ТЬ** *несов. кого-что* ҡыҙҙырыу, ярһытыу; **горячи́ть коня́** атты ярһытыу

**ГОРЯЧИ́ТЬСЯ** *несов.* ҡыҙыу, ярһыу; **напра́сно горячи́ться** юҡҡа ҡыҙыу

**ГОРЯ́ЧКА** *ж* **1.** *уст.*, *прост.* өшөтөү-яндырыу (*ауырыу*) **2.** ҡыуыу, сабыу (*аҡса өсөн*) **3.** ҡабаланыу, ашығыслыҡ, ығы-зығы килеү, өтәләнеү; **горя́чка пе́ред отъе́здом** юлға сығыр алдынан ҡабаланыу ♦ **поро́ть горя́чку** саманан артыҡ ашығып эш итеү

**ГОРЯ́ЧНОСТЬ** *ж* ҡыҙыулыҡ, яндырайлыҡ, ашҡыныусанлыҡ; **проявля́ть изли́шнюю горя́чность** артыҡ ҡыҙыулыҡ күрһәтеү; **неуме́стная горя́чность** урынһыҙ яндырайлыҡ

**ГОРЯЧО́ 1.** *нареч. см.* **горя́чий** 1; **2.** *кому-чему в знач. сказ., безл.* эҫе; **мне горячо́** миңә эҫе; **рука́м горячо́** ҡулға эҫе

**ГОСБА́НК** *м* дәүләт банкыһы

**ГОСБЮДЖЕ́Т** *м* дәүләт бюджеты

**ГОСКРЕДИ́Т** *м* дәүләт кредиты

**ГОСПИТАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **госпитализи́ровать**

**ГОСПИТАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* госпиталгә (хәстәханаға) һалыу; **госпитализи́ровать больно́го** ауырыуҙы госпиталгә һалыу

**ГО́СПИТАЛЬ** *м* госпиталь; **полево́й го́спиталь** ялан госпитале

**ГОСПИТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое госпиталь ...ы; **госпита́льный врач** госпиталь табибы

**ГОСПОДИ́Н** *м* **1.** (*при обращении*) әфәнде; **господи́н посо́л** илсе әфәнде **2.** (*хозяин*) хужа **3.** (*представитель привилегированного класса*) бай, баяр ♦ **быть господи́ном своего́ сло́ва (своему́ сло́ву)** үҙ һүҙеңә хужа булыу; **сам себе́ господи́н** үҙенә үҙе хужа

**ГОСПО́ДСКИЙ,** -ая, -ое баяр ...ы, бай ...ы; **госпо́дские зе́мли** баяр ерҙәре; **госпо́дский дом** бай йорто

**ГОСПО́ДСТВО** *с* хакимлыҡ, өҫтөнлөк; **госпо́дство в во́здухе** һауала өҫтөнлөк

**ГОСПО́ДСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** хакимлыҡ (өҫтөнлөк) итеү, өҫтөнлөк алыу; **госпо́дствовать на мо́ре** диңгеҙҙә өҫтөнлөк итеү **2.** (*преобладать*) өҫтөнлөк итеү; **здесь госпо́дствуют ю́го-за́падные ве́тры** бында көньяк-көнбайыш елдәре өҫтөнлөк итә **3.** *над чем* (*возвышаться*) юғарыраҡ (ҡалҡып) тороу

**ГОСПО́ДСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **госпо́дствовать 2.** *прил.* хакимлыҡ (өҫтөнлөк) итеүсе; **госпо́дствующие кла́ссы** хакимлыҡ итеүсе синыфтар **3.** *прил.* өҫтөнлөк итеүсе; **госпо́дствующее мне́ние** өҫтөнлөк итеүсе фекер

**ГОСПО́ДЬ** *м* Хоҙай, Алла ♦ **ах ты, го́споди!** йә хоҙай!; **упаси́, го́споди!** алла һаҡлаһын!, хоҙай күрһәтмәһен!

**ГОСПОЖА́** *ж* **1.** (*при обращении*) ханым **2.** (*хозяйка*) хужабикә **3.** (*представительница привилегированного класса*) байбикә, байбисә

**ГОСТЕВО́Й,** -ая, -ое ҡунаҡ ...ы; **гостевы́е места́ на трибу́не** трибунала ҡунаҡтар урыны

**ГОСТЕПРИИ́МНЫЙ,** -ая, -ое ҡунаҡсыл; **гостеприи́мный хозя́ин** ҡунаҡсыл хужа

**ГОСТЕПРИИ́МСТВО** *с* ҡунаҡсыллыҡ; **прояви́ть гостеприи́мство** ҡунаҡсыллыҡ күрһәтеү

**ГОСТИ́НАЯ** *ж* **1.** (*комната*) ҡунаҡ бүлмәһе **2.** (*обстановка*) ҡунаҡ бүлмәһе йыһазы

**ГОСТИ́НЕЦ** *м*; *прост.* күстәнәс

**ГОСТИ́НИЦА** *ж* ҡунаҡхана; **устро́иться в гости́нице** ҡунаҡханала урынлашыу

**ГОСТИ́НИЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡунаҡхана ...ы; **гости́ничная ко́мната** ҡунаҡхана бүлмәһе

**ГОСТИ́НЫЙ: гости́ный двор** сауҙа йорто, каруанһарай

**ГОСТИ́ТЬ** *несов.* ҡунаҡ булыу, ҡунаҡсылау

**ГОСТЬ** *м* и **ГО́СТЬЯ** *ж* ҡунаҡ; **жела́нный гость** көтөп алынған ҡунаҡ; **уважа́емый гость** ҡәҙерле ҡунаҡ; **приглаша́ть в го́сти** ҡунаҡҡа саҡырыу; **идти́ в го́сти** ҡунаҡҡа барыу; **быть в гостя́х** ҡунаҡта булыу; **ходи́ть по гостя́м** ҡунаҡсылап йөрөү

**ГОСУДА́РСТВЕННОСТЬ** *ж* дәүләтселек; **национа́льная госуда́рственность** милли дәүләтселек

**ГОСУДА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое дәүләт ...ы; **госуда́рственный герб** дәүләт гербы; **госуда́рственные грани́цы** дәүләт сиктәре; **де́ло госуда́рственной ва́жности** дәүләт әһәмиәтендәге эш ♦ **госуда́рственное пра́во** *юр.* дәүләт хоҡуғы; **госуда́рственные экза́мены** дәүләт имтихандары

**ГОСУДА́РСТВО** *с* дәүләт; **незави́симое госуда́рство** бойондороҡһоҙ дәүләт

**ГОСУДА́РЫНЯ** *ж* **1.** ҡатын (әбей) батша **2.** *уст.* (*при обращении*) ханым

**ГОСУДА́РЬ** *м* **1.** (*правитель*) батша **2.** *уст.* (*при обращении*) әфәнде, ғали йәнәптәре ♦ **ми́лостивый госуда́рь** *уст.* мөхтәрәм әфәнде

**ГО́ТИКА** *ж* готика (*Урта быуаттың һуңғы осоронда Европала киң таралған архитектура стиле*)

**ГОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое готик; **готи́ческая архитекту́ра** готик архитектура; **готи́ческий храм** готик храм ♦ **готи́ческий шрифт** готик шрифт (*хәрефтәрҙе мөйөшләп, осло итеп, кәкерсәкләп яҙыу рәуеше*)

**ГОТОВА́ЛЬНЯ** *ж* готовальня (*һауытҡа йыйылған һыҙым ҡорамалдары*)

**ГОТО́ВИТЬ** *несов. кого-что*; *в разн. знач.* әҙерләү; **гото́вить ка́дры** кадрҙар әҙерләү; **гото́вить по́езд к отпра́вке** поезды юлға сығырға әҙерләү; **гото́вить уро́ки** дәрес әҙерләү; **гото́вить обе́д** төшкө аш әҙерләү; **гото́вить дрова́** утын әҙерләү; **гото́вить уда́р по врагу́** дошманға һөжүм әҙерләү

**ГОТО́ВИТЬСЯ** *несов.* **1.** *к чему* или *с неопр.* әҙерләнеү; **гото́виться к отъе́зду** юлға сығыуға әҙерләнеү; **гото́виться к прыжку́** һикерергә әҙерләнеү; **гото́виться к экза́менам** имтихандарға әҙерләнеү **2.** (*надвигаться, назревать*) булырға тороу, яҡынлашып килеү; **гото́вятся кру́пные собы́тия** ҙур ваҡиғалар булырға тора **3.** *страд. от* **гото́вить**

**ГОТО́ВНОСТЬ** *ж* әҙерлек, әҙер булыу; **боева́я гото́вность** хәрби әҙерлек; **прове́рить гото́вность к экспеди́ции** экспедицияға әҙерлекте тикшереү; **изъяви́ть гото́вность помо́чь** ярҙамлашырға әҙер булыуҙы белдереү

**ГОТО́ВЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* әҙер; **гото́вые изде́лия** әҙер әйберҙәр; **гото́вые поня́тия** әҙер төшөнсәләр; **быть гото́вым помо́чь** ярҙам итергә әҙер булыу; **обе́д гото́в** төшкө аш әҙер ♦ **жить на всём гото́вом** әҙергә хәҙер булып йәшәү

**ГОФРИРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое гофрировкалау ...ы; **гофрирова́льная маши́на** гофрировкалау машинаһы

**ГОФРИРОВА́НИЕ** *с см.* **гофрирова́ть**

**ГОФРИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **гофрирова́ть 2.** *прил.* гофрировкалы, бөрөлгән; **гофриро́ванная бума́га** гофрировкалы ҡағыҙ; **гофриро́ванная ю́бка** гофрировкалы юбка

**ГОФРИРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* гофрировкалау, бөрмәләү; **гофрирова́ть подо́л пла́тья** күлдәк итәген бөрмәләү

**ГОФРИРОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **гофрирова́ть**

**ГОФРИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **гофрирова́ть 2.** гофрировка (*берәй нәмәлә тулҡын шикелле параллель һырҙар теҙеү*)

**ГРАБ** *м* граб (*ағас*)

**ГРАБЁЖ** *м* талау

**ГРАБИ́ТЕЛЬ** *м* и **ГРАБИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* талаусы

**ГРАБИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое талау ...ы; **граби́тельская поли́тика** талау сәйәсәте

**ГРА́БИТЬ** *несов. кого-что* талау; **гра́бить магази́н** магазинды талау

**ГРА́БЛЕНЫЙ,** -ая, -ое урланған, талап алынған; **гра́бленые ве́щи** талап алынған әйберҙәр

**ГРА́БЛИ** *только мн.* тырма; **ко́нные гра́бли** ат тырмаһы; **ручны́е гра́бли** ҡул тырмаһы

**ГРАВЁР** *м* гравёр, гравюрлау оҫтаһы

**ГРАВЁРНЫЙ,** -ая, -ое гравёр ...ы; **гравёрная мастерска́я** гравёр оҫтаханаһы

**ГРА́ВИЙ** *м* ваҡ таш, ҡырсынташ

**ГРАВИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ваҡ таш ...ы, ҡырсынташ ...ы; **грави́йные карье́ры** ҡырсынташ карьерҙары

**ГРАВИРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое гравёрлау ...ы; **гравирова́льное иску́сство** гравёрлау сәнғәте; **гравирова́льные инструме́нты** гравёрлау ҡоралдары

**ГРАВИРОВА́НИЕ** *с см.* **гравирова́ть**

**ГРАВИРОВА́ТЬ** *несов. что* гравёрлау (*металға, ағасҡа һ.б. соҡоп йәки химик юл менән яҙыу, һүрәт төшөрөү*)

**ГРАВИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **гравирова́ть**; **гравиро́вка узо́ров** биҙәктәр гравёрлау **2.** гравировка; **укра́сить изде́лие гравиро́вкой** эшләп сығарылған нәмәне гравировка менән биҙәү

**ГРАВИРО́ВЩИК** *м см.* **гравёр**

**ГРАВИТА́ЦИЯ** *ж* гравитация (*бөтә донъя тартылышы; йыһандағы бөтә есемдәрҙең берберенә тартылыу үҙсәнлеге*)

**ГРАВЮ́РА** *ж* гравюра (**1.** *ағасҡа, металға һ.б. соҡоп йәки башҡа юл менән төшөрөлгән рәсем һәм шуның ҡағыҙға баҫылған күсермәһе* **2.** *ошо ысул менән башҡарылған сәнғәттең графика бүлеге*); **цветна́я гравю́ра** төҫлө гравюра; **гравю́ра на де́реве** ағасҡа гравюра; **вы́ставка гравю́р** гравюралар күргәҙмәһе

**ГРАВЮ́РНЫЙ,** -ая, -ое гравюра ...ы; **гравю́рная те́хника** гравюра техникаһы

**ГРАД I** *м* **1.** боҙ, борсаҡ; **дождь с гра́дом** борсаҡ ҡатыш ямғыр **2.** *чего*; *перен.* сикһеҙ күп, бик күп, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ; **град насме́шек** сикһеҙ күп мыҫҡыл; **град пи́сем** бик күп хат **3.** *в знач. нареч.* **гра́дом** бик күп булып, шыбыр; **спе́лые я́блоки посы́пались гра́дом** бешкән алмалар бик күп булып ҡойолдо; **пот лил с него́ гра́дом** ул шыбыр тиргә батҡайны

**ГРАД II** *м*; *уст. см.* **го́род**

**ГРАДА́ЦИЯ** *ж* градация (*бер хәлдән икенсеһе хәлгә күскәндәге әҙмә-әҙлелек*)

**ГРА́ДИНА** *ж*; *разг.* боҙ (борсаҡ) бөртөгө

**ГРА́ДИНКА** *ж*; *уменьш. от* **гра́дина**

**ГРАДИ́РНЯ** *ж* градирня (**1.** *тоҙло һыуҙы ҡайнатып, тоҙ ала торған ҡоролма* **2.** *сәнәғәттә эҫе һыуҙы һыуытыу өсөн ҡулланылған башнялы ҡоролма*)

**ГРАДИ́РОВАНИЕ** *с см.* **гради́ровать**

**ГРАДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* градирлау (*градирняла ҡайнатып, тоҙло иретмәнең һыуын бөтөрөү*)

**ГРАДОБИ́ТИЕ** *с* боҙ һуғыу (*мәҫ., сәсеүлекте*)

**ГРАДОВО́Й,** -ая, -ое боҙ ...ы, борсаҡ ...ы; **градова́я ту́ча** боҙ болото

**ГРАДОНАЧА́ЛЬНИК** *м*; *ист.* ҡала башлығы

**ГРАДОСТРОЕ́НИЕ** *с см.* **градострои́тельство**

**ГРАДОСТРОИ́ТЕЛЬ** *м* ҡала төҙөүсе (*архитектор*)

**ГРАДОСТРОИ́ТЕЛЬСТВО** *с* ҡала төҙөлөшө (төҙөү); **но́вшество в градострои́тельстве** ҡала төҙөлөшөндәге яңылыҡтар

**ГРАДУИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* градустарға бүлеү, градус билдәләре һыҙыу; **градуи́ровать термо́метр** термометрҙы градустарға бүлеү

**ГРА́ДУС** *м* градус (**1.** *түңәрәктең 360-тан бер өлөшөнә тигеҙ мөйөш йәки дуға үлсәү берәмеге* **2.** *температураны үлсәү берәмеге* **3.** *спирттың процентын күрһәткән берәмек*) ♦ **под гра́дусом** ҡыҙмаса булыу

**ГРА́ДУСНИК** *м*; *разг.* градусник; **измеря́ть гра́дусником** градусник менән үлсәү

**ГРАЖДАНИ́Н** *м* граждан; **гражда́нка** *ж* гражданка; **граждани́н страны́** *какой-л.* берәй илдең гражданы; **почётный граждани́н го́рода** ҡаланың хөрмәтле гражданы

**ГРАЖДА́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** гражданлыҡ ...ы; **гражда́нский ко́декс** гражданлыҡ кодексы; **гражда́нское пра́во** гражданлыҡ хоҡуғы; **гражда́нский долг** гражданлыҡ бурысы; **гражда́нское му́жество** гражданлыҡ батырлығы; **гражда́нская ли́рика Н.А.Некра́сова** Н.А.Некрасовтың гражданлыҡ лирикаһы **2.** граждан ...ы; **гражда́нская слу́жба** граждан хеҙмәте; **гражда́нский возду́шный флот** граждан һауа флоты; **гражда́нская оде́жда** граждан кейеме ♦ **гражда́нская война́** граждандар һуғышы; **гражда́нская панихи́да** гражданлыҡ йыназаһы; **гражда́нская смерть** *уст.* гражданлыҡ үлеме (*барлыҡ гражданлыҡ хоҡуҡтарынан мәхрүм ителеү*); **гражда́нский брак** гражданлыҡ никахы (*загста яҙылышмай өйләнешеү*)

**ГРАЖДА́НСТВО** *с* гражданлыҡ; **росси́йское гражда́нство** Рәсәй гражданлығы; **приня́ть гражда́нство** гражданлыҡ ҡабул итеү ♦ **дать права́ гражда́нства** гражданлыҡ хоҡуҡтарын биреү (таныу); **получи́ть права́ гражда́нства** гражданлыҡ хоҡуҡтарын алыу (*дөйөм танылыу, киң таралыу табыу*)

**ГРАМЗА́ПИСЬ** *ж* грамзапись (*махсус таҫмаға яҙылған музыка әҫәре, телмәр*)

**ГРАММ** *м* грамм; **пять гра́ммов зо́лота** биш грамм алтын

**ГРАММА́ТИКА** *ж*; *лингв.* грамматика; **сравни́тельная грамма́тика** сағыштырма грамматика; **шко́льная грамма́тика** мәктәп грамматикаһы

**ГРАММАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** грамматика ...ы; **граммати́ческие пра́вила** грамматика ҡағиҙәләре **2.** грамматик; **граммати́ческие оши́бки** грамматик хаталар; **граммати́ческий строй языка́** телдең грамматик төҙөлөшө

**ГРАММОФО́Н** *м* граммофон

**ГРАММОФО́ННЫЙ,** -ая, -ое граммофон ...ы; **граммофо́нная пласти́нка** граммофон моң табағы

**ГРА́МОТА** *ж* **1.** уҡый-яҙа белеү, белем, грамота; **знать гра́моту** уҡый-яҙа белеү; **полити́ческая гра́мота** сәйәси белем **2.** (*документ*) грамота; **похва́льная гра́мота** маҡтау грамотаһы; **вери́тельные гра́моты** *дип.* ышаныс грамотаһы ♦ **фи́лькина гра́мота** мәғәнәһеҙ документ, буш ҡағыҙ

**ГРАМОТЕ́Й** *м*; *разг.* уҡый-яҙа белеүсе

**ГРА́МОТНО** *нареч.* грамоталы; **гра́мотно писа́ть** грамоталы яҙыу

**ГРА́МОТНОСТЬ** *ж* **1.** уҡый-яҙа белеү; **повыше́ние гра́мотности населе́ния** халыҡтың уҡый-яҙа белеүен күтәреү **2.** *перен.* белемле булыу, грамоталылыҡ, мәғлүмәтлелек; **техни́ческая гра́мотность** техник грамоталылыҡ; **полити́ческая гра́мотность** сәйәси яҡтан мәғлүмәтлелек **3.** дөрөҫ эшләнгәнлек (эшләнеү), еренә еткереп эшләнгәнлек (эшләнеү); **гра́мотность прое́кта** проекттың еренә еткереп эшләнгәнлеге; **гра́мотность чертежа́** һыҙманың еренә еткереп эшләнеүе

**ГРА́МОТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡый-яҙа белгән, уҡымышлы, грамоталы; **гра́мотный челове́к** уҡымышлы кеше; **гра́мотный учени́к** грамоталы уҡыусы **2.** *перен.* (*знающий, сведущий*) мәғлүмәтле; **гра́мотный инжене́р** мәғлүмәтле инженер **3.** (*не содержащий ошибок*) грамоталы, хатаһыҙ; **гра́мотное сочине́ние** хатаһыҙ инша **4.** *перен.* (*умело выполненный*) еренә еткереп эшләнгән, грамоталы; **гра́мотный чертёж** еренә еткереп эшләнгән һыҙма

**ГРАМПЛАСТИ́НКА** *ж* грампластинка, көйтабаҡ, моңтабаҡ; **записа́ть на грампласти́нку** грампластинкаға яҙыу

**ГРАН** *м*; *фарм.* гөрәнкә (*0,062 грамға тиң аптека үлсәүе берәмеге*) ♦ **нет ни гра́на** бөртөк тә юҡ

**ГРАНА́Т I** *м* гранат, анар (*көньяҡ ағасы һәм шул ағастың емеше*); **цвето́к грана́та** гранат сәскәһе

**ГРАНА́Т II** *м*; *мин.* гранат (*ҡиммәтле аҫыл таш*)

**ГРАНА́ТА** *ж*; *воен*. граната (*шартлатҡыс*); **ручна́я грана́та** ҡул гранатаһы; **оско́лочная грана́та** ярсыҡлы граната; **бро́сить грана́ту** граната ырғытыу

**ГРАНА́ТНЫЙ,** -ая, -ое граната …ы; **грана́тные оско́лки** граната ярсыҡтары

**ГРАНА́ТОВЫЙ I,** -ая, -ое **1.** анар …ы, гранат …ы; **грана́товое де́рево** анар ағасы **2.** (*цве́та граната*) анар (гранат) төҫлө, ҡуйы ҡыҙыл

**ГРАНА́ТОВЫЙ II,** -ая, -ое гранат …ы; **грана́товый брасле́т** гранат беләҙек

**ГРАНАТОМЁТ** *м*; *воен*. гранатомёт

**ГРАНАТОМЁТЧИК** *м*; *воен*. граната ырғытыусы

**ГРАНДИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое грандиоз, ғәйәт ҙур; **грандио́зное зре́лище** ғәйәт ҙур тамаша; **грандио́зные преобразова́ния** грандиоз үҙгәртеп ҡороуҙар

**ГРАНЕ́НИЕ** *с см*. **грани́ть**

**ГРАНЁННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **грани́ть**

**ГРАНЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡырлы; **гранёный стака́н** ҡырлы стакан **2.** ҡырланған, ҡырлап яһалған; **гранёный хруста́ль** ҡырланған гәлсәр

**ГРАНИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡырлау …ы; **грани́льная мастерска́я** ҡырлау оҫтаханаһы; **грани́льное иску́сство** ҡырлау сәнғәте

**ГРАНИ́ЛЬЩИК** *м* и **ГРАНИ́ЛЬЩИЦА** *ж* ҡырлаусы

**ГРАНИ́Т** *м*; *геол*. гранит (*ялан шпаты һәм слюданан торған ҡаты тау тоҡомо*); **кра́сный грани́т** ҡыҙыл гранит; **украша́ть грани́том** гранит менән биҙәү

**ГРАНИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** гранит …ы; **грани́тная глы́ба** ҙур гранит таш **2.** гранит; **грани́тный па́мятник** гранит һәйкәл

**ГРАНИТО́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** гранитоль …ы **2.** гранитоль, гранитолдән яһалған; **гранито́левый портфе́ль** гранитоль портфель

**ГРАНИТО́ЛЬ** *м* гранитоль (*яһалма күн*); **оби́тый гранито́лем дива́н** гранитоль менән көпләнгән диван

**ГРАНИ́ТЧИК** *м* гранитсы, гранит эшкәртеүсе

**ГРАНИ́ТЬ** *несов. что* ҡырлау (*ташты, быяланы*); **грани́ть алма́зы** алмас ҡырлау; **грани́ть хруста́ль** гәлсәр ҡырлау

**ГРАНИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **грани́ть**

**ГРАНИ́ЦА** *ж*; *в разн. знач*. сик; **госуда́рственная грани́ца** дәүләт сиге; **грани́ца ме́жду Евро́пой и А́зией** Европа менән Азия араһындағы сик; **морска́я грани́ца** диңгеҙ сиге; **не знать грани́ц** *в чём-л. берәй нәмәлә* сик белмәү; **сверх вся́ких грани́ц** бөтә сиктән артыҡ ♦ **за грани́цу** сит илдәргә; **за грани́цей** сит илдәрҙә; **из-за грани́цы** сит илдәрҙән

**ГРАНИ́ЧИТЬ** *несов. с чем* **1.** (*иметь общую границу*) сиктәш булыу, сикләшеү **2.** *перен*. яҡын тороу, бер булыу; **тру́сость в бою́ грани́чит с преда́тельством** һуғышта ҡурҡаҡлыҡ хыянат итеү менән бер

**ГРА́НКА** *ж*; *полигр*. гранка (*типографияла йыйылып, әле биттәргә бүленмәгән набор һәм шул наборҙың ҡағыҙға күсерелгән баҫмаһы*)

**ГРА́НУЛА** *ж*; *спец*. гранула (*берәй нәмәнең ҡаты бөртөгө*)

**ГРАНУЛИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое *спец*. **1.** *прич. от* **гранули́ровать** **2.** *прил*. гранулллы; **гранули́рованный суперфосфа́т** гранулллы суперфосфат

**ГРАНУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец*. гранулллау; **гранули́ровать шлак** шлакты гранулллау; **гранули́ровать хими́ческие удобре́ния** химик ашламаларҙы гранулллау

**ГРАНУЛЯ́ЦИЯ** *ж* **1.** *спец*. гранулллау; **грануля́ция удобре́ний** ашламаларҙы гранулллау **2.** *астр*. грануляция (*Ҡояш йөҙөнөң бөртөк-бөртөк булып күренеүе*) **3.** *мед*. грануляция (*яра урынына ит үргәндә бөртөкләнеп торған кеүек яңы туҡыма*)

**ГРАНЬ** *ж* **1.** сик; **стира́ние гра́ней ме́жду у́мственным и физи́ческим трудо́м** аҡыл һәм физик хеҙмәт араһындағы сиктәрҙең юйыла барыуы **2.** ҡыр; **гра́ни ку́ба** кубтың ҡырҙары ♦ **на гра́ни** сигендә; **на гра́ни безу́мия** аҡылдан яҙыу сигендә

**ГРАССИ́РОВАТЬ** *несов*. "р" өнөн һаҡау итеп әйтеү (*французса итеп әйтеү*)

**ГРАФ** *м* граф (*барондан юғары дворянлыҡ титулы һәм шул титулдағы ир кеше*)

**ГРАФА́** *ж* графа (**1.** *таблицала, кенәгәлә ике вертикаль һыҙыҡ араһындағы бағана йәки ара* **2.** *текстағы бүлек, рубрика*)

**ГРА́ФИК I** *м* график (**1.** *төрлө эш-күренештең һан күрһәткестәрен бергә бәйләгән һыҙыҡ* **2.** *эштең күләме һәм үтәлеү ваҡыты күрһәтелгән план*); **гра́фик движе́ния поездо́в** поездар хәрәкәте графигы; **рабо́тать по гра́фику** график буйынса эшләү

**ГРА́ФИК II** *м* график (*рәссам*)

**ГРА́ФИКА** *ж* графика (**1.** *һынлы сәнғәттең ысын нәмәләрҙе һәм күренеште һыҙыҡтар, штрихтар менән төшөрә торған бер төрө һәм шул төргә ҡараған сәнғәт әҫәре* **2.** *лингв. баҫма йәки яҙма хәрефтәрҙең яҙылышы*; *һөйләү теленең шул хәрефтәр менән кәүҙәленеше*); **произведе́ния гра́фики** графика әҫәрҙәре; **вы́ставка гра́фики** графика күргәҙмәһе; **жи́вопись и гра́фика** һынлы сәнғәт һәм графика

**ГРАФИ́Н** *м* графин; **хруста́льный графи́н** гәлсәр графин

**ГРАФИ́НЯ** *ж* графтың ҡатыны, графтың ҡыҙы

**ГРАФИ́Т** *м* графит (**1.** *углеродтың бер төрө булған ҡара йәки һоръолт ҡара төҫтәге минерал* **2.** *шул минералдан эшләнгән ҡәләм үҙәге*)

**ГРАФИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *см*. **графи́товый**

**ГРАФИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** графит …ы; **графи́товая поро́да** графит тоҡомо; **графи́товые ме-**

**сторожде́ния** графит яткылыктары **2.** графит, графиттан яһалған; **графи́товые изде́лия** графит нәмәләр

**ГРАФИ́ТЬ** *несов. что* графалау, графаларға һыҙыу; **графи́ть бума́гу** ҡағыҙҙы графаларға һыҙыу

**ГРАФИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое **1.** график ...ы **2.** график, график ...ы, график ярҙамында; **графи́ческий ме́тод реше́ния зада́чи** мәсьәлә сисеүҙең график ысулы

**ГРАФИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое графика ...ы; **графи́ческое иску́сство** графика сәнғәте

**ГРАФЛЁННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **графи́ть**

**ГРАФЛЁНЫЙ,** -ая, -ое графалы, графаларға һыҙылған; **графлёная бума́га** графалы ҡағыҙ

**ГРАФО́ЛОГ** *м* графолог, графология белгесе

**ГРАФОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое графология ...ы; **графологи́ческий ме́тод** графология ысулы

**ГРАФОЛО́ГИЯ** *ж* графология (*кешенең психикаһын һәм һәләттәрен билдәләү өсөн уның яҙыу үҙенсәлеген өйрәнеү эше*)

**ГРАФОМА́Н** *м* графоман, графомания менән ауырыусы

**ГРАФОМА́НИЯ** *ж* графомания (*әҙәби әҫәр яҙыу менән мауығыу ауырыуы*)

**ГРА́ФСКИЙ,** -ая, -ое граф ...ы; **гра́фский ти́тул** граф титулы

**ГРА́ФСТВО** *с* графлыҡ (**1.** *граф титулы* **2.** *феодаль ҡоролошта граф биләмәһендәге ер* **3.** *Англияла, АҠШ-та һ.б. ҡайһы бер дәүләттәрҙә эре административ-территориаль берәмек*)

**ГРАЦИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое зифа буйлы, матур һынлы, нәзәкәтле, һомғол, матур (*хәрәкәткә ҡарата*); **грацио́зная де́вушка** зифа буйлы ҡыҙ; **грацио́зные движе́ния** матур хәрәкәттәр; **грацио́зный стан** һомғол кәүҙә

**ГРА́ЦИЯ** *ж* **1.** һомғоллоҡ, матурлыҡ, нәзәкәтлелек (*хәрәкәт һәм буй-һынға ҡарата*) **2.** грация (*корсеттың бер төрө*)

**ГРАЧ** *м* ҡара ҡарға

**ГРАЧИ́НЫЙ,** -ая, -ое ҡара ҡарға ...ы; **грачи́ное гнездо́** ҡара ҡарға ояһы

**ГРЕБЁНКА** *ж* тараҡ ♦ **под гребёнку стричь** ҡыҫҡартып ҡырҡыу; **стричь (всех) под одну́ гребёнку** бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалыу

**ГРЕ́БЕНЬ** *м* **1.** тараҡ; **ча́стый гре́бень** ваҡ тараҡ **2.** *тех.* (*стойка с зубьями*) ҡаба; **пряди́льный гре́бень** иләү ҡабаһы **3.** (*у птиц*) кикрек; **петуши́ный гре́бень** әтәс кикреге **4.** (*верхний край чего-л.*) һырт; **гре́бень волны́** тулҡын һырты

**ГРЕБЕ́Ц** *м* ишкәксе, ишкәк ишеүсе

**ГРЕБЕШО́К** *м*; *уменьш. от* **гре́бень** 1, 3, 4

**ГРЕ́БЛЯ** *ж* **1.** ишеү; **гре́бля вёслами** ишкәктәр менән ишеү; **академи́ческая гре́бля** академик ишеү **2.** тырмалау; **гре́бля се́на** бесән тырмалау

**ГРЕБНО́Й,** -ая, -ое **1.** ишеү ...ы; **гребно́й спорт** ишеү спорты **2.** ишкәкле; **гребно́е су́дно** ишкәкле судно **3.** ишә торған; **гребно́й винт** ишә торған винт

**ГРЕБО́К** *м* ишеү (*ишкәк менән бер ишеп ҡуйыу*)

**ГРЁЗА** *ж* хыял, татлы хыял; **мир грёз** татлы хыялдар донъяһы

**ГРЕ́ЗИТЬ** *несов.* **1.** татлы хыялға сумыу, хыялланыу **2.** (*видеть во сне*) төштә күреү

**ГРЕ́ЗИТЬСЯ** *несов. кому* **1.** хыялға бирелеү **2.** (*сниться*) төшкә инеү

**ГРЕ́ЙДЕР** *м* грейдер (*канал ҡаҙа, юл тигеҙләй торған машина*)

**ГРЕ́ЙПФРУТ** и **ГРЕЙПФРУ́Т** *м* грейпфрут (*мәңге йәшел цитрус емеш ағасы һәм шул ағастың хуш еҫле емеше*)

**ГРЕ́КИ** *мн.* гректар, грек халҡы // *ед.* **грек** *м* грек ир-аты; **греча́нка** *ж* грек ҡатын-ҡыҙы

**ГРЕ́ЛКА** *ж* грелка, йылытҡыс

**ГРЕМЕ́ТЬ** *несов.* **1.** күкрәү (*күккә ҡарата*); гөрһөлдәү, шартлау (*атыу тауышына ҡарата*); яңғырау (*музыкаға ҡарата*); шалтырау, шалтыр-шолтор килеү (*тимер, сынаяҡ нәмәләргә ҡарата*); дыңғырлау (*арбаға ҡарата*); **гром греми́т** күк күкрәй; **греми́т вы́стрел** атыу гөрһөлдәй **2.** *чем* шалтыратыу, шалтыр-шолтор килтереү, дыңғырлатыу; **греме́ть посу́дой** һауытһабаны шалтыратыу **3.** *перен.* (*славиться*) яңғырау, шаулау

**ГРЕМУ́ЧИЙ,** -ая, -ее гөрөлдәүекле, яңғырауыҡлы, шалтырауыҡ ♦ **грему́чий газ** *хим.* шартлаҡыс газ; **грему́чая змея́** *зоол.* шалтырауыҡ йылан (*тропикта йәшәүсе ағыулы йылан*); **грему́чая ртуть** *хим.* шартлағыс терегөмөш

**ГРЕ́НА** *ж собир.* грена (*ебәк күбәләге күкәйҙәре*)

**ГРЕНАДЕ́Р** *м*; *ист.* гренадер (*революцияға тиклем Рәсәйҙә махсус полкта хеҙмәт иткән оҙон буйлы һалдат йәки офицер*)

**ГРЕНКИ́** *мн.* (*ед.* **грено́к** *м*) и *разг.* **ГРЕ́НКИ** *мн.* (*ед.* **гре́нок** *м*) ҡыҙҙырылған икмәк киҫәктәре; **суп с гренка́ми** ҡыҙҙырылған икмәк киҫәктәре һалынған өйрә

**ГРЕСТИ́** *несов.* **1.** *чем* и *без доп.* ишеү; **грести́ к бе́регу** ярға табан ишеү; **грести́ бы́стро** шәп ишеү **2.** *что* тырмау, тырмалау, тырматыу, гөрөү; **грести́ се́но** бесән тырмалау; **грести́ снег** ҡар гөрөү ♦ **грести́ де́ньги лопа́той** аҡсаны көрәп алыу

**ГРЕСТИ́СЬ** *несов. страд. от* **грести́** 2

**ГРЕТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.* йылытыу; **со́лнце гре́ет** ҡояш йылыта; **греть во́ду** һыу йылытыу ♦ **греть ру́ки** *на чём* байыу (*алдашып*)

**ГРЕ́ТЬСЯ** *несов.* йылыныу, ҡыҙыныу; **гре́ться на со́лнышке** ҡояшта ҡыҙыныу; **вода́ гре́ется** һыу йылына

**ГРЕХ** *м* **1.** *рел.* гөнаһ; **впасть в грех** гөнаһҡа ҡалыу **2.** гөнаһ, ғәйеп; **грехи́ мо́лодости** йәшлек гөнаһтары **3.** *в знач. сказ., с неопр.; разг.* яҙыҡ, гөнаһ; **над ста́ростью смея́ться грех** ҡартлыҡтан көлөү яҙыҡ ♦ **как на грех** гөнаһ шомлоғо кеүек, әйтерһең, юрый; **от греха́ пода́льше** бәләһенән баш-аяҡ; **с грехо́м попола́м** көс-хәл менән, нисек етте шулай; **что греха́ таи́ть** сер итеп тотоп булмай, тураһын әйтергә кәрәк

**ГРЕХО́ВНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* гөнаһлы; **грехо́вные по́мыслы** гөнаһлы уйҙар

**ГРЕХОВО́ДНИК** *м; разг., уст.* гөнаһлы кеше, боҙоҡ ир-ат; **греховóдница** *ж; разг. уст.* гөнаһлы (боҙоҡ) ҡатын-ҡыҙ

**ГРЕ́ЦКИЙ: гре́цкий оре́х** эстерхан сәтләүеге

**ГРЕ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое грек ...ы, Греция ...ы; **гре́ческий язы́к** грек теле; **гре́ческое иску́сство** Греция сәнғәте

**ГРЕЧИ́ХА** *ж* ҡарабойҙай; **се́ять гречи́ху** ҡарабойҙай сәсеү

**ГРЕЧИ́ШНЫЙ,** -ая, -ое ҡарабойҙай ...ы; **гречи́шное по́ле** ҡарабойҙай баҫыуы; **гречи́шный мёд** ҡарабойҙай балы

**ГРЕ́ЧКА** *ж; разг.* ҡарабойҙай ярмаһы ♦ **в гре́чку; в гре́чке** бүртә сыбар (*йылҡы төҫө*)

**ГРЕ́ЧНЕВЫЙ,** -ая, -ое ҡарабойҙай ...ы; **гре́чневая крупа́** ҡарабойҙай ярмаһы; **гре́чневая ка́ша** ҡарабойҙай бутҡаһы

**ГРЕШИ́ТЬ** *несов.* **1.** гөнаһ эшләү (ҡылыу) **2.** *против чего* или *чем* ҡаршы барыу, боҙоу; **греши́ть про́тив и́стины** хәҡиҡәткә ҡаршы барыу

**ГРЕ́ШНИК** *м* и **ГРЕ́ШНИЦА** *ж* гөнаһлы кеше

**ГРЕШНО́** *в знач. сказ., с неопр.; разг.* гөнаһ, яҙыҡ, оят; **с таки́м чу́дным го́лосом не петь грешно́** шундай иҫ киткес тауыш менән йырламау яҙыҡ

**ГРЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое гөнаһлы; **гре́шный челове́к** гөнаһлы кеше ♦ **гре́шным де́лом** *в знач. вводн. сл.* гөнаһ шомлоғона ҡаршы

**ГРЕШО́К** *м; уменьш. от* **грех** 2

**ГРИБ** *м* бәшмәк; **бе́лый гриб** аҡ бәшмәк; **съедо́бные грибы́** ашарға яраҡлы бәшмәктәр; **ядови́тые грибы́** ағыулы бәшмәктәр ♦ **расти́ как грибы́ (по́сле дождя́)** бик тиҙ һәм күп үҫеү, бик тиҙ үрсеү

**ГРИБКО́ВЫЙ,** -ая, -ое бәшмәк ...ы; **грибко́вая культу́ра** бәшмәк культураһы; **грибко́вое заболева́ние** бәшмәк ауырыуы

**ГРИБНИ́К** *м; разг.* бәшмәксе, бәшмәк йыйырға әүәҫ кеше

**ГРИБНИ́ЦА** *ж* **1.** *бот.* бәшмәклек (*бәшмәк епсәләре*) **2.** бәшмәклек, бәшмәк үҫтереү урыны **3.** бәшмәк йыйырға әүәҫ ҡатын-ҡыҙ

**ГРИБНО́Й,** -ая, -ое **1.** бәшмәк ...ы; **грибно́й за́пах** бәшмәк еҫе; **грибно́й суп** бәшмәк ашы **2.** бәшмәкле; **грибно́е ме́сто** бәшмәкле урын ♦ **грибно́й дождь** ҡояшлы ямғыр

**ГРИБОВА́РНЯ** *ж* бәшмәк ҡайнатыу урыны (*тоҙлау һәм маринадлау урыны*)

**ГРИБО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **гриб 2.** *биол.* үңәҙ, бәшмәк; **плесневы́е грибки́** үңәҙ бәшмәге

**ГРИ́ВА** *ж* ял; **лошади́ная гри́ва** ат ялы; **льви́ная гри́ва** арыҫлан ялы

**ГРИВА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* яллы, оҙон яллы; **грива́стый конь** оҙон яллы ат

**ГРИ́ВЕННИК** *м; разг.* ун тин, ун тинлек (*аҡса*)

**ГРИЛЬЯ́Ж** *м* грильяж (*ҡыҙҙырылған сәтләүекле йәки миндалле кәнфит төрө*)

**ГРИМ** *м* грим; **игра́ть в гри́ме** грим һалып уйнау; **снять грим** гримды һөртөп алыу

**ГРИМА́СА** *ж* боҙоҡ сырай (йөҙ), сырай (йөҙ) боҙоу

**ГРИМА́СНИЧАНЬЕ** *с см.* **грима́сничать**

**ГРИМА́СНИЧАТЬ** *несов.* сырай боҙоп (һытып) ҡыланыу

**ГРИМЁР** *м* гримлаусы, грим һалыусы

**ГРИМИРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое гримлау (грим һалыу) ...ы; **гримирова́льные кра́ски** грим һалыу буяуҙары

**ГРИМИРОВА́ТЬ** *несов. кого-что* гримлау, грим һалыу

**ГРИМИРОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** грим һалыу (*үҙеңә*); гримлау (*үҙеңде*) **2.** *страд. от* **гримирова́ть**

**ГРИПП** *м* грипп; **боле́ть гри́ппом** грипп менән ауырыу

**ГРИППОВА́ТЬ** *несов.; разг.* грипп менән ауырыу

**ГРИППО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** грипп ...ы; **грippо́зное заболева́ние** грипп ауырыуы; **гриппо́зные явле́ния** грипп билдәләре **2.** грипплы, грипп менән; **гриппо́зный больно́й** грипп менән ауырыусы

**ГРИФ I** *м* гриф (**1.** *боронғо мифологияла арыҫлан кәүҙәле, бөркөт ҡанатлы, бөркөт йәки арыҫлан башлы хайуан* **2.** *зоол. емтек менән туҡланған йыртҡыс ҡош*)

**ГРИФ II** *м; муз.* гриф (*ҡыллы музыка ҡоралдарының ҡыл тартып ҡуйылған тар өлөшө*)

**ГРИФ III** *м* гриф (**1.** *ҡултамға йәки кульяҙманың һүрәте төшөрөп яһалған мөһөр һәм шундай мөһөр менән яһалған баҫма, оттиск* **2.** *документтың, баҫманың тышына йәки титул битенә яҙылған махсус яҙыу*); **кни́га с гри́фом институ́та** институт грифы менән баҫылған китап

**ГРИ́ФЕЛЬ** *м* грифель (*аспид таҡтаға яҙа торған таш ҡәләм*)

**ГРИ́ФЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** грифель ...ы; **2.** грифель; **гри́фельная доска́** грифель таҡта;

**гри́фельная плита́** грифель плита ♦ **гри́фельный сла́нец** грифель һәүерташы

**ГРОБ** *м* **1.** табут **2.** *в знач. сказ.*; *прост.* һәләкәт, бөттө ♦ **в гроб вогна́ть** ҡәбергә тығыу; **до гро́ба** үлгәнсе; **смотре́ть (гляде́ть) в гроб** үлем алдында тороу; **стоя́ть одно́й ного́й в гробу́** бер аяҡ ерҙә, икенсеһе гүрҙә булыу; **хоть в гроб ложи́сь** ятып үлергә генә ҡалды (*шул тиклем ауыр хәл*)

**ГРОБНИ́ЦА** *ж* төрбә, кәшәнә; **возводи́ть гробни́цу** төрбә ҡуйыу

**ГРОБОВО́Й,** -ая, -ое табут ...ы; **гробова́я кры́шка** табут ҡапҡасы; **гробово́е молча́ние**; **гробова́я тишина́** ҡәбер тынлығы ♦ **гробово́й го́лос** йәмһеҙ ҡалын тауыш

**ГРОБОВЩИ́К** *м* табут яһаусы

**ГРОГ** *м* грог (*араҡыға йәки ромға шәкәрле һыу ҡатнаштырып әҙерләнгән ҡаты эсемлек*)

**ГРОЗА́** *ж* **1.** йәшен; **дождь с грозо́й** йәшенле ямғыр **2.** *кого-чего*; *перен.* дәһшәт (ҡурҡыныс) һалыусы

**ГРОЗДЬ** *ж* тәлгәш; **гроздь я́год** еләк тәлгәше

**ГРОЗИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кому* и *без доп.* (*угрожать*) янау, ҡурҡытыу **2.** *кому-чему* (*делать угрожающий жест*) янау; **грози́ть па́льцем** бармаҡ янау **3.** (*заключать в себе угрозу*) -рға/-рғә тороу, ҡурҡыныс тыуҙырыу; **скала́ грози́т обва́лом** ҡая емерелергә тора; **цикло́н грози́т наводне́нием** циклон һыу ташыу ҡурҡынысы тыуҙыра **4.** *кому-чему* (*предстоять — о несчастье*) ҡурҡыныс алдында тороу, янау; **ему́ грози́т опа́сность** уға ҡурҡыныс янай

**ГРОЗИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **грози́ть** 1, 2

**ГРО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дәһшәтле, ҡурҡыныс; **гро́зный враг** дәһшәтле дошман; **гро́зное ору́жие** дәһшәтле ҡорал; **гро́зная си́ла** дәһшәтле көс **2.** (*содержащий в себе угрозу*) ҡаты, усал; **гро́зный вид** усал ҡиәфәт; **гро́зный о́крик** ҡаты екереү **3.** *разг.* (*суровый*) усал, рәхимһеҙ; **гро́зный муж** усал ир

**ГРОЗОВО́Й,** -ая, -ое **1.** йәшен(ле) ...ы; **грозово́й дождь** йәшенле ямғыр; **грозовы́е облака́** йәшен болоттары **2.** йәшенле, йәшенле-ямғырлы; **грозово́е ле́то** йәшенле-ямғырлы йәй

**ГРОМ** *м* **1.** күкрәү, күк күкрәү; **раска́ты гро́ма** күк күкрәү тауыштары **2.** (*сильный шум*) гөрһөлдәү, ҡаты шартлау, көслө (шау); **гром аплодисме́нтов** көслө алҡыштар; **гром пу́шек** туптар гөрһөлдәүе ♦ **(как) гром среди́ я́сного не́ба** аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек; **как гро́мом порази́ть** йәшен (башҡа) һуҡҡан кеүек итеү; **мета́ть гро́мы и мо́лнии** ауыҙҙан ут сәсеү (яуҙырыу), ҡаты тиргәү; **пока́ гром не гря́нет** килеп терәлмәйенсә

**ГРОМА́ДА** *ж* ғәйәт (бик) ҙур нәмә (*королма, тауҙар һ.б.*); **грома́ды гор** бик ҙур тауҙар

**ГРОМА́ДИНА** *ж*; *разг.* бик ҙур нәмә

**ГРОМА́ДНЫЙ,** -ая, -ое бик ҙур, ғәйәт ҙур; **грома́дный го́род** ғәйәт ҙур ҡала; **грома́дный успе́х** бик ҙур уңыш

**ГРОМИ́ЛА** *м*; *разг.* **1.** талаусы, бур (*йоҙаҡ, ишек ватып инеусе*) **2.** талаусы, ҡыйратыусы, баҫҡынсы; **фаши́стские громи́лы** фашист баҫҡынсылары **3.** уҫлаптай әҙәм

**ГРОМИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** ватыу, емереү, ҡыйратыу, тар-мар итеү; **громи́ть врага́** дошманды тар-мар итеү **2.** *перен., разг.* (*обличать*) тетеп ташлау, тетмәһен тетеү; **громи́ть кри́тиков** тәнҡитселәрҙе тетеп ташлау

**ГРО́МКИЙ,** -ая, -ое **1.** көслө, ҡаты, ҡысҡырып, яңғырауыҡлы; **гро́мкий го́лос** көслө тауыш; **гро́мкий разгово́р** ҡысҡырып һөйләшеү **2.** данлыҡлы, шаулы; **гро́мкое и́мя** данлыҡлы исем; **гро́мкий проце́сс** шаулы процесс **3.** *перен.* (*напыщенный*) ҡабарынҡы, яңғырауыҡлы; **гро́мкие слова́** яңғырауыҡлы һүҙҙәр

**ГРОМКОГОВОРИ́ТЕЛЬ** *м* репродуктор

**ГРОМКОГОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое көслө тауышлы; **громкоголо́сый челове́к** көслө тауышлы кеше

**ГРОМОВО́Й** и **ГРОМО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** күк күкрәү ...ы; **громовы́е раска́ты** күк күкрәү тауыштары **2.** *перен.* бик ҡаты, ҡолаҡ тондорғос; **громово́й го́лос** ҡолаҡ тондорғос тауыш **3.** *перен.* (*сокрушительный*) емергес; **громово́й отве́т** емергес яуап

**ГРОМОГЛА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бөтә кеше ишетерлек, бик көслө (*тауышҡа, йырлауға һ.б. ҡарата*); **громогла́сное заявле́ние** бөтә кеше ишетерлек белдереү **2.** көслө тауышлы; **громогла́сный челове́к** көслө тауышлы кеше

**ГРОМОЗДИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (өҫтө-өҫтөнә) өйөү; **громозди́ть я́щики** йәшниктәрҙе өҫтө-өҫтөнә өйөү **2.** *перен., разг.* тултырыу, туплау, өйөү; **громозди́ть одну́ цита́ту на другу́ю** цитата өҫтөнә цитата өйөү

**ГРОМОЗДИ́ТЬСЯ** *несов.* өҫтө-өҫтөнән күренеү (өйөлөү), өйөлөшөү; **вдали́ громозди́лись ска́лы** алыҫта ҡаялар өҫтө-өҫтөнән күренеп тора

**ГРОМО́ЗДКИЙ,** -ая, -ое ҙур күләмле, ауыр; **громо́здкие ве́щи** ҙур һәм ауыр әйберҙәр

**ГРОМООТВО́Д** *м* йәшен ҡайтарғыс

**ГРОМОПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое күк күкрәгәндәй, күк күкрәгән кеүек; **громоподо́бный го́лос** күк күкрәгән кеүек тауыш

**ГРОМЫХА́НЬЕ** *с см.* **громыха́ть**

**ГРОМЫХА́ТЬ** *несов.*; *разг.* дөбөрләү, дыңғырлау, дөбөр-шатыр килеү, дөбөр-дөбөр килеү; (*о громе*) гөрһөлдәү, күкрәү

**ГРОМЫХНУ́ТЬ** *сов.* дөбөрләп, гөрһөлдәп ҡуйыу

**ГРОССМЕ́ЙСТЕР** *м* гроссмейстер; **турни́р гроссме́йстеров** гроссмейстерҙар турниры

**ГРОССМЕ́ЙСТЕРСКИЙ,** -ая, -ое гроссмейстер ...ы; **гроссме́йстерское зва́ние** гроссмейстер исеме

**ГРОТ** *м* тау ҡыуышы, мәғәрә

**ГРОТЕ́СК** *м* гротеск, арттырып ебәреү (**1.** *әҙәбиәттә, сәнғәттә тормош күренешен гә-*

*ҙəттəн тыш арттырып күрһəтеүгə ҡоролған алым һəм ошо алым менəн ижад ителгəн əҫəр* **2.** *типогр. бер тигеҙ ҡалынлыҡтағы шрифтың атамаһы*)

**ГРОТÉСКНЫЙ,** -ая, -ое гротеск ...ы, самаһыҙ ҡабартып (арттырып) күрһəтелгəн; **гротéскный стиль** гротеск стиле

**ГРОТÉСКОВЫЙ,** -ая, -ое гротесклы, ҡабарынҡы, арттырылған; **гротéсковая трактóвка óбраза** образды самаһыҙ ҡабарынҡы трактовкалау

**ГРÓХАТЬ** *несов. см.* **грóхнуть**

**ГРÓХАТЬСЯ** *несов. см.* **грóхнуться**

**ГРÓХНУТЬ** *сов.* **1.** *разг.* (*издать грохот*) гөрҫ (тарҫ, дөп) итеү **2.** *что*; *разг.* шап (дөп, гөрҫ) иттереү; **грóхнуть вязáнку дров нá пол** утын бəйлəмен иҙəнгə дөп иттереү

**ГРÓХНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* гөрҫ (дөп) итеп йығылыу; **грóхнуться нá пол** иҙəнгə гөрҫ итеп йығылыу

**ГРÓХОТ I** *м* гөрһөлдəү, дөбөрлəү; **грóхот пýшек** туптар гөрһөлдəүе

**ГРÓХОТ II** *м*; *тех.* эре илəк (*орлоҡ, ком, ваҡ таш, илəүҙə ҡулланыла*)

**ГРОХОТÁНЬЕ** *с см.* **грохотáть**

**ГРОХОТÁТЬ** *несов.* дабырлау, тарһылдау, дөбөрлəү, гөрһөлдəү; **грохóчут пýшки** туптар гөрһөлдəй

**ГРОШ** *м* **1.** *уст.* ярты тин (*аҡса*) **2.** *только мн.* **грошú**; *разг.* бик аҙ аҡса (хаҡ) **3.** грош (*Польшала һəм Австрияла бер тинлек аҡса*) ♦ **грош ценá** хаҡы бер тин; **грошá мéдного (лóманого) не стóит** һуҡыр бер тин дə тормай; **ни грошá нет** бер тин дə юҡ; **ни в грош не стáвить** *кого-что* һанға һуҡмау, бар тип тə белмəү

**ГРОШÓВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** бик арзанлы; **грошóвая ценá** бик арзан хаҡ **2.** *перен.* ваҡтөйəк, юҡ хөкөмөндəге; **грошóвые расчёты** ваҡтөйəк иҫəп-хисап

**ГРУБÉТЬ** *несов.* **1.** ҡытыршыланыу; **кóжа грубéет** тире ҡытыршылана **2.** (*о голосе*) ҡалынайыу **3.** (*становиться неделикатным*) тупаҫланыу

**ГРУБИ́ТЬ** *несов. кому* тупаҫ һүҙ əйтеү

**ГРУБИЯ́Н** *м*; *разг.* тупаҫ (тəрпə) ир-ат; **грубия́нка** *ж*; *разг.* тупаҫ (тəрпə) ҡатын-ҡыҙ

**ГРУБИЯ́НИТЬ** *несов.*; *разг.* тупаҫлыҡ эшлəү

**ГРУ́БОСТЬ** *ж* **1.** тупаҫлыҡ; **грýбость обращéния** мөғəмəлəлəге тупаҫлыҡ **2.** тупаҫ һүҙ, тупаҫлыҡ; **говори́ть грýбости** тупаҫ һүҙҙəр əйтеү; **допусти́ть грýбость в игрé** уйында тупаҫлыҡтар ебəреү

**ГРУБОШЁРСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шырт (ҡаты) йөнлө; **грубошёрстные порóды овéц** шырт йөнлө һарыҡтар тоҡомо **2.** шырт (ҡаты) йөндəн эшлəнгəн (һуғылған); **грубошёрстная ткань** шырт йөндəн һуғылған туҡыма

**ГРУ́БЫЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* тупаҫ; **грýбая óбувь** тупаҫ аяҡ кейеме; **грýбый гóлос** тупаҫ тауыш; **грýбый человéк** тупаҫ кеше; **грýбое обращéние** тупаҫ мөғəмəлə; **грýбый отвéт** тупаҫ яуап; **грýбая оши́бка** тупаҫ хата; **грýбое нарушéние дисципли́ны** тəртипте тупаҫ боҙоу **2.** (*жёсткий*) ҡаты, шырт, тупаҫ; **грýбая кóжа** тупаҫ күн; **грýбая шерсть** шырт йөн **3.** *перен.* тупаҫ; **грýбый обмáн** тупаҫ алдау; **грýбая рабóта** тупаҫ эш ♦ **грýбые кормá** *с.-х.* тупаҫ (ҡоро) аҙыҡтар (*һалам, бесəн, кəбəк һ.б.*); **грýбая пи́ща** тупаҫ ашамлыҡ (*составы клетчаткаға бай аҙыҡ*)

**ГРУ́ДА** *ж* (ҙур) өйөм, күс; **грýда камнéй** таш өйөмө; **грýда развáлин** емереклектəр өйөмө

**ГРУДÁСТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** киң күкрəкле **2.** ҡалҡыу күкрəкле

**ГРУДИ́НА** *ж* **1.** *анат.* күкрəк һөйəге **2.** *см.* **груди́нка**

**ГРУДИ́НКА** *ж* түш ите

**ГРУДИ́ТЬСЯ** и **ГРУ́ДИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** тупланыу, йыйылышыу; **грачи́ нáчали груди́ться** ҡара ҡарғалар туплана башланы **2.** (*толпиться — о людях*) өймəклəшеү, өйөлөшөү

**ГРУДНИ́ЦА** *ж*; *разг.* имсəк биҙе шешеү

**ГРУДНÓЙ,** -ая, -ое **1.** күкрəк ...ы, түш ...ы; **груднáя клéтка** күкрəк ситлеге; **груднáя пóлость** күкрəк ҡыуышлығы **2.** имсəк; **груднóй ребёнок** имсəк бала; **в груднóм вóзрасте** имсəк йəшендə ♦ **груднóй гóлос** күкрəктəн сыҡҡан тауыш

**ГРУДОБРЮ́ШНЫЙ: грудобрю́шная прегрáда** *анат.* күкрəк шаршауы, диафрагма

**ГРУДЬ** *ж* **1.** күкрəк, түш; **ширóкая грудь** киң күкрəк; **вы́пятить грудь** түш киреү; **дышáть пóлной грýдью** күкрəк тултырып тын алыу **2.** *анат.* (*женская*) имсəк; **корми́ть грýдью** имсəк имеҙеү; **отня́ть от груди́** имсəктəн айырыу **3.** (*у рубашки, платья*) түш; **застегнýть грудь рубáшки** күлдəктең түшен элəктереү ♦ **стоя́ть (стать, встать) грýдью** күкрəк киреп, ҡаршы тороу (*яҡлау*)

**ГРУЖÉНИЕ** *с см.* **грузи́ть**

**ГРУ́ЖЕННЫЙ** и **ГРУЖЁННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **грузи́ть**

**ГРУЖЁНЫЙ,** -ая, -ое йөк тейəлгəн, йөклө; **гружёные вагóны** йөк тейəлгəн вагондар

**ГРУЗ** *м* **1.** ауырлыҡ, ауыр нəмə **2.** йөк; **вагóны с грýзом** йөк тейəлгəн вагондар

**ГРУЗДЬ** *м* гөрөздə; **собирáть грýзди** гөрөздə йыйыу; **соли́ть грýзди** гөрөздə тоҙлау

**ГРУЗИ́ЛО** *с*; *рыб.* батырғыс

**ГРУЗИ́НСКИЙ,** -ая, -ое грузин...ы, Грузия ...ы; **грузи́нский язы́к** грузин теле; **грузи́нское искýсство** Грузия сəнғəте ♦ **грузи́нский чай** грузин сəйе

**ГРУЗИ́НЫ** *мн.* грузиндар, грузин халҡы // *ед.* **грузи́н** *м* грузин ир-аты; **грузи́нка** *ж* грузин ҡатын-ҡыҙы

**ГРУЗИ́ТЬ** *несов. кого-что* тейәү; **грузи́ть маши́ну дрова́ми** машинаға утын тейәү; **грузи́ть скот в ваго́ны** вагондарға мал тейәү

**ГРУЗИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тейәнеү, тейәлеү; **грузи́ться в ло́дки** кәмәләргә тейәлеү **2.** *страд. от* **грузи́ть**

**ГРУЗНЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* ауырайыу; **к ста́рости нача́ть грузне́ть** ҡартая килә ауырая башлау

**ГРУ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ауыр, һалмаҡ; **гру́зные воро́та** ауыр ҡапҡа **2.** ауыр һөйәкле (кәүҙәле), йыуан; **гру́зный челове́к** йыуан кеше **3.** (*о походке, шагах и т.п.*) һалмаҡ **4.** (*тяжело нагруженный*) ауыр тейәлгән

**ГРУЗОВИ́К** *м* грузовик, йөк машинаһы

**ГРУЗОВЛАДЕ́ЛЕЦ** *м* йөк хужаһы

**ГРУЗОВО́Й,** -ая, -ое йөк ...ы; **грузово́й тра́нспорт** йөк транспорты

**ГРУЗООБОРО́Т** *м* йөк әйләнеше (*билдәле ваҡыт эсендә транспортта ташылған йөк иҫәбе*)

**ГРУЗООТПРАВИ́ТЕЛЬ** *м* йөк ебәреүсе

**ГРУЗОПОДЪЁМНИК** *м* йөк күтәргес (*домкрат, үҙе йөрөмәле кран һ.б.*)

**ГРУЗОПОДЪЁМНОСТЬ** *ж* йөк күтәреүсәнлек (*мәҫ., күтәреү кранының күтәрә алыу һәләте*)

**ГРУЗОПОДЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое йөк (ауырлыҡ) күтәреү ...ы; **грузоподъёмная маши́на** йөк күтәреү машинаһы

**ГРУЗОПОЛУЧА́ТЕЛЬ** *м* йөк алыусы (*кеше йәки учреждение*)

**ГРУЗОПОТО́К** *м* йөк(тәр) хәрәкәте (*йөктәрҙең юлда билдәле ваҡыт эсендә булыуы*)

**ГРУ́ЗЧИК** *м* и **ГРУ́ЗЧИЦА** *ж* йөксө (*йөк тейәүсе һәм бушатыусы*)

**ГРУНТ** *м* **1.** тупраҡ, ер; **гли́нистый грунт** мәтеле тупраҡ; **вы́садка расса́ды в откры́тый грунт** үрсетмәне асыҡ ергә күсереп ултыртыу **2.** (*твёрдое дно*) һыу төбө **3.** *иск.* ерлек, грунт (*буяласаҡ йәки һүрәт яһаласаҡ әйбергә беренсе ҡат яғылған буяу*) **4.** *иск.* грунт (*гравюрала һәм рәсемдә штрихланған фон*)

**ГРУНТОВА́ТЬ** *несов. что*; *иск.* грунтлау, ерлек һалыу (*буяла торған нәмәләрҙе беренсе ҡат буяп сығыу*)

**ГРУНТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **грунтова́ть**

**ГРУНТО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **грунтова́ть**; **грунто́вка холста́** киндер туҡыманы грунтлау **2.** *см.* **грунт** 3; **ма́сляная грунто́вка** майлы буяу яғылған ерлек

**ГРУНТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ер (грунт) ...ы; **грунтова́я доро́га** арба юлы (*түшәлмәгән юл*); **грунтовы́е во́ды** ер аҫты һыуҙары **2.** ерлек (грунт) ...ы; **грунтовы́е кра́ски** ерлек буяуҙары

**ГРУ́ППА** *ж*; *в разн. знач.* группа, төркөм; **гру́ппа вса́дников** һыбайлылар төркөмө; **деса́нтная гру́ппа** десант төркөмө; **гру́ппа углево́дов** углеводтар группаһы; **гру́ппа уча́щихся** уҡыусылар төркөмө ♦ **гру́ппы кро́ви** ҡандың группалары (*кеше ҡанындағы аҡһым төҙөлөшөнөң төрлөлөгө менән билдәләнгән биохимик сифат үҙенсәлеге*)

**ГРУППИРОВА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** төркөмләү, группалау **2.** (*классифицировать*) төркөмдәргә (группаларға) айырыу, туптарға айырыу (тупланыу)

**ГРУППИРОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** группаларға (төркөмдәргә) йыйылыу, төркөм-төркөм тупланыу **2.** *страд. от* **группирова́ть**

**ГРУППИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **группирова́ть, группирова́ться** **2.** группа, төркөм, берләшмә; **демократи́ческая группиро́вка** демократик берләшмә

**ГРУППОВО́Й,** -ая, -ое төркөм (группа) менән булған, төркөмдән (группанан) торған, күмәк; **групповы́е и́гры** күмәк уйындар; **группово́й портре́т** күмәкләп төшкән портрет ♦ **группово́й брак** группалы никах (*бер төркөмдөң һәр ире икенсе төркөмдөң һәр ҡатыны менән йәшәй ала торған никах төрө*)

**ГРУППОВЩИ́НА** *ж*; *неодобр.* группасылыҡ, төркөмсөлөк

**ГРУСТИ́ТЬ** *несов.* яманһыулау, бойоғоу, бошоноу, эс бошоу

**ГРУ́СТНО 1.** *нареч.* яманһыу, бойоҡ; **гру́стно улыба́ться** яманһыу йылмайыу **2.** *кому в знач. сказ., безл.* яманһыу, бойоҡ; **мне ста́ло гру́стно** миңә яманһыу булып китте

**ГРУ́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яманһыу, һағышлы, бойоҡ, моңһоу; **гру́стный челове́к** бойоҡ кеше; **гру́стная пе́сня** моңһоу йыр; **гру́стный взор** бойоҡ ҡараш; **гру́стные мы́сли** һағышлы уйҙар **2.** *разг.* (*досадный*) күңелһеҙ; **гру́стные результа́ты** күңелһеҙ һөҙөмтәләр

**ГРУСТЬ** *ж* һағыш, эс бошоу, бошонҡолоҡ; **неодоли́мая грусть** һары һағыш; **предава́ться гру́сти** һағышҡа бирелеү

**ГРУ́ША** *ж* груша, армыт; **сла́дкая гру́ша** шәрбәтле (татлы) груша; **посади́ть гру́шу** груша ултыртыу

**ГРУШЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое груша кеүек, груша (армыт) рәүешендәге; **грушеви́дная айва́** груша рәүешендәге айва

**ГРУ́ШЕВЫЙ,** -ая, -ое груша ...ы, армыт ...ы; **гру́шевое де́рево** армыт ағасы; **гру́шевое варе́нье** груша ҡайнатмаһы

**ГРУШО́ВКА** *ж* грушовка (**1.** *груша шарабы* **2.** *алмағас сорты*)

**ГРЫ́ЖА** *ж*; *мед.* бүҫер; **па́ховая гры́жа** сат бүҫере

**ГРЫ́ЗЛО** *с*; *спец.* ауыҙлыҡ, айыссыҡ

**ГРЫЗНЯ́** *ж*; *разг.* **1.** (*между животными*) тешләшеү, талашыу **2.** *перен.* сәйнәшеү, һүгешеү, әрләшеү

**ГРЫЗТЬ** *несов.* **1.** *что* кимереү, ярыу; **грызть кость** һөйәк кимереү; **грызть оре́хи** сәтләүек ярып ашау; **грызть се́мечки** көнбағыш ярыу **2.** *кого*; *перен.*, *разг.* сәйнәү, талау; **она́ грызёт меня́ с утра́ до ве́чера** ул мине иртәнән кискә тиклем талай **3.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*терзать, мучить — о мыслях, чувствах и т.п.*) йөҙәтеү, яфалау

**ГРЫ́ЗТЬСЯ** *несов.* **1.** тешләшеү, талашыу; **соба́ки грызу́тся** эттәр тешләшә **2.** *перен.*, *прост.* (*ссориться*) талашыу, тиргәшеү, әрләшеү

**ГРЫЗУ́Н** *м*; *зоол.* кимереүсе (*куян, йомран, сыскан, тейен һ.б.*); **отря́д грызуно́в** кимереүселәр отряды

**ГРЯДА́** *ж* **1.** теҙмә; **гряда́ гор** тауҙар теҙмәһе **2.** (*в огороде*) түтәл; **гряда́ клубни́ки** еләк түтәле **3.** *чего* өйкөм, өйөм; **гряда́ облако́в** болоттар өйкөмө

**ГРЯ́ДИЛЬ** *м* һабан уҡлауы

**ГРЯ́ДКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **гряда́** 2; **2.** (*у саней и телег*) үрәсә

**ГРЯ́ДКОВЫЙ,** -ая, -ое түтәл ...ы; **гря́дковая культу́ра** түтәл культураһы

**ГРЯДУ́ЩИЙ,** -ая, -ее *высок.* **1.** киләсәк, алдағы; **гряду́щие поколе́ния** киләсәк быуындар **2.** *в знач. сущ.* **гряду́щее** *с* киләсәк; **смотре́ть в гряду́щее с наде́ждой** киләсәккә өмөт менән ҡарау ♦ **на сон гряду́щий** йоҡо алдынан

**ГРЯЗЕВО́Й,** -ая, -ое ләм ...ы; **грязевы́е исто́чники** ләм сығанаҡтары

**ГРЯЗЕЛЕЧЕ́БНИЦА** *ж* ләм шифаханаһы, ләм менән дауалау урыны

**ГРЯЗЕЛЕЧЕ́НИЕ** *с* ләм менән дауалау (дауаланыу)

**ГРЯЗНЕ́ТЬ** *несов.* бысраныу, батҡаҡланыу, керләнеү

**ГРЯЗНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* бысратыу, батҡаҡлау, керләндереү; **грязни́ть пол** иҙәнде бысратыу **2.** *кого*; *перен.* (*порочить*) бысратыу, ҡара яғыу

**ГРЯЗНИ́ТЬСЯ** *несов.* бысраныу, батҡаҡланыу, керләнеү

**ГРЯ́ЗНО** **1.** *нареч.* бысраҡ; **гря́зно писа́ть** бысраҡ яҙыу **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* бысраҡ; **на у́лице гря́зно** урамда бысраҡ

**ГРЯЗНУ́ЛЯ** *м* и *ж*; *разг.* бысраҡ, әшәке, шапшаҡ (*кеше*)

**ГРЯ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бысраҡ; **гря́зный двор** бысраҡ ишек алды **2.** бысраҡ, бысранған, керле, керләнгән; **гря́зная посу́да** бысраҡ һауыт; **гря́зные ру́ки** бысраҡ ҡулдар; **гря́зное бельё** бысраҡ кер **3.** *перен.* (*гнусный*) бысраҡ, әшәке; **гря́зное де́ло** бысраҡ эш; **гря́зный анекдо́т** әшәке көләмәс **4.** (*о цвете*) буръяҡ, һорғолт буҙ

**ГРЯЗЬ** *ж* **1.** бысраҡ, батҡаҡ; **по́сле дождя́ на доро́ге грязь** ямғырҙан һуң юлда бысраҡ **2.** (*на теле, белье*) бысраҡ кейем, кер **3.** (*нечистота*) бысраҡ сүп-сар **4.** *перен.* бысраҡ, бысраҡлыҡ, әшәкелек; **навали́ть грязь** *на кого-л.* *кемгәлер* бысраҡлыҡ өйөү **5.** *мн.* **гря́зи** ләм; **лечи́ться гря́зями** ләм менән дауаланыу ♦ **меси́ть грязь** бысраҡ ярып барыу; **броса́ть (кида́ть) гря́зью** *в кого* бысраҡ ташлау; **втопта́ть (затопта́ть) в гря́зь** *кого кемгәлер* бысраҡ (ҡара) яғыу

**ГРЯ́НУТЬ** *сов.* **1.** гөрҫ (дарҫ) итеп ҡалыу, күкрәү, яңғырау; **гря́нул гром** күк күкрәне; **гря́нул вы́стрел** атыу тауышы яңғыраны; **гря́нула му́зыка** музыка яңғыраны **2.** *что* и *без доп.* башлап (йәки уйнап) ебәреү; **музыка́нты гря́нули марш** музыканттар марш уйнап ебәрҙе **3.** *перен.* (*разразиться*) башланып китеү; **гря́нула война́** һуғыш башланып китте.

**ГУА́НО** *с нескл.* гуано (*диңгеҙ ҡоштарының ашлама итеп файҙаланылған тиҙәге*)

**ГУА́ШЬ** *ж* гуашь (**1.** *аҡ буяуға елем ҡатнаштырып, һыуға иҙелгән ҡуйы буяу* **2.** *шул буяу менән төшөрөлгән һүрәт*)

**ГУБА́ I** *ж* **1.** ирен; **ве́рхняя губа́** өҫкө ирен; **то́нкие гу́бы** йоҡа ирендәр; **сжать гу́бы** ирен ҡымтыу **2.** *мн.* **гу́бы**; *спец.* морон (*ҡыҫҡыста һ.б.*) ♦ **губа́ не ду́ра** *у кого*; *прост.* аҡылы алтын икән; **за́ячья губа́** китек ирен; **наду́ть гу́бы** иренде турһайтыу (*үпкәләү*); **молоко́ на губа́х не обсо́хло** ауыҙында әсә һөтө кипмәгән (*йәш, тәжрибәһеҙ*)

**ГУБА́ II** *ж*; *геогр.* ҡултыҡ; **О́бская губа́** Обь ҡултығы

**ГУБА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡалын (турһыҡ) иренле

**ГУБЕРНА́ТОР** *м* губернатор (**1.** *Рәсәйҙә губерна башлығы* **2.** *АҠШ-тың, Латин Америкаһының ҡайһы бер илдәрендә юғары вазифалы кеше* **3.** *ҡайһы бер колонияларҙа юғары вазифалы кеше*)

**ГУБЕРНА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое губернатор ...ы; **губерна́торская до́лжность** губернатор вазифаһы ♦ **положе́ние ху́же губерна́торского** *шутл.* эштәр шәптән түгел, хәл бик мөшкөл

**ГУБЕРНА́ТОРСТВО** *с* губернаторлыҡ, губернатор вазифаһы

**ГУБЕ́РНИЯ** *ж*; *ист.* губерна (*XVIII б. башлап Рәсәйҙә административ-территориаль берәмек*); **Оренбу́ргская губе́рния** Ырымбур губернаһы ♦ **пошла́ писа́ть губе́рния** *шутл.* ығы-зығы башланды

**ГУБЕ́РНСКИЙ,** -ая, -ое губерна ...ы; **губе́рнское правле́ние** губерна идараһы

**ГУБИ́ТЕЛЬ** *м* и **ГУБИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* харап (һәләк) итеүсе

**ГУБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һәләкәтле, һәләкәткә килтерә торған, харап иткес, емергес, зарарлы, зарар килтерә торған; **губи́тельное влия́ние** һәләкәткә килтерә торған йоғонто; **губи́тельный для здоро́вья кли́мат** сәләмәтлеккә зарарлы климат

**ГУБИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что*; *прям.*, *перен.* һәләк (харап, әрәм) итеү; **за́морозки гу́бят посе́вы** ҡырау сәсеүлектәрҙе һәләк итә; **губи́ть лес** урманды һәләк итеү; **губи́ть вре́мя** ваҡытты әрәм итеү; **губи́ть де́ньги** аҡсаны әрәм итеү **2.** юғалтыу, үлтереү, бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, әрәм итеү; **губи́ть здоро́вье** сәләмәтлекте юғалтыу; **губи́ть челове́ка** кешене әрәм итеү

**ГУБИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **губи́ть**

**ГУ́БКА I** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **губа́** I 1

**ГУ́БКА II** *ж* болот, губка (**1.** *диңгеҙҙә йәшәгән күп күҙәнәкле хайуандарҙың түбән тибы* **2.** *шул хайуандарҙың ҡауы, һөлдәһе*; *йыуыныу өсөн ҡулланылған һәм резинанан, поролондан уларҙың ҡауына оҡшатып яһалған күҙәнәкле, һығылмалы нәмә*); **мы́ться гу́бкой** губка менән йыуыныу

**ГУБНО́Й,** -ая, -ое ирен ...ы; **губны́е мы́шцы** ирен мускулдары; **губна́я пома́да** ирен (иннеге) помадаһы; **губны́е согла́сные** *лингв.* ирен тартынҡылары

**ГУБОШЛЁП** *м*; *прост.* **1.** һалпы ирен, шалпыҡ ауыҙ **2.** *бран.* асыҡ ауыҙ, йыбытҡы

**ГУ́БЧАТЫЙ,** -ая, -ое ваҡ-ваҡ (күҙ-күҙ) тишекле, көпшәк; **гу́бчатая рези́на** көпшәк резина

**ГУВЕРНА́НТКА** *ж* гувернантка (*өйҙә балаларға тәрбиә биреүсе һәм уҡытыусы*)

**ГУВЕРНЁР** *м* гувернёр

**ГУГЕНО́ТЫ** *мн.* (*ед.* **гугено́т** *м* и **гугено́тка** *ж*); *уст.* гугеноттар (*сиркәү һәм хөкүмәт тарафынан эҙәрләнгән XVI—XVIII бб. француз протестанттары*)

**ГУГУ́: ни гугу́** *в знач. сказ.*: 1) өндәшмәй, тын да сығармай; 2) (*приказание или просьба молчать*) өндәшмә, тыныңды ла сығарма, ләммим, ауыҙыңды ла асма

**ГУДЕ́НИЕ** *с см.* **гуде́ть**; **гуде́ние проводо́в** сымдар геүләүе

**ГУДЕ́ТЬ** *несов.* **1.** геүләү, геүелдәү, жыуылдау, ҡысҡыртыу (*машинаға, гудокка һ.б. ҡарата*); **ве́тер гуди́т** ел геүелдәй; **гудо́к гуди́т** гудок ҡысҡырта **2.** *безл.* зыңлау, геүләү, сеңләү, шаулау; **в уша́х гуди́т** ҡолаҡ зыңлай; **в голове́ гуди́т** баш шаулай

**ГУДО́К** *м* гудок; **гудо́к парохо́да** пароход гудогы; **дать гудо́к** гудок биреү

**ГУДРО́Н** *м* гудрон (*нефть ҡыуғандан ҡала торған ыҫмала кеүек ҡуйы ҡара матдә — юл төҙөү өсөн, түбә ябыуына ҡойоу өсөн ҡулланыла*)

**ГУДРОНИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* гудронлау; **гудрони́ровать шоссе́** шоссены гудронлау

**ГУДРОНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **гудрони́ровать**

**ГУДРО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** гудрон ...ы; **гудро́нная смесь** гудрон ҡатышмаһы **2.** гудронлы; **гудро́нное шоссе́** гудронлы шоссе

**ГУЖ** *м* ҡолаҡбау, ҡамыт бауы

**ГУЖЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡолаҡбау ...ы; **гужево́й реме́нь** ҡолаҡбау ҡайышы **2.** егеүле; **гужево́й тра́нспорт** егеүле транспорт

**ГУЖО́М** *нареч.* ылаулап, ылау менән; **вози́ть това́ры гужо́м** тауарҙы ылау менән ташыу

**ГУЛ** *м* шау, геү, гөрөлдәү; **гул мо́ря** диңгеҙ шауы

**ГУ́ЛКИЙ,** -ая, -ое яңғыраулы, яңғырап (шаңғырап) торған; **гу́лкий звук** яңғыраулы тауыш; **гу́лкие сво́ды** яңғырап торған (*бейек*) көмбәҙҙәр

**ГУЛЬБА́** *ж*; *прост.* типтереү (*эскеле күңел асыш*)

**ГУ́ЛЬДЕН** *м* гульден (*Нидерланды аҡса берәмеге*)

**ГУЛЯ́КА** *м* и *ж*; *разг.* типтереүсе, типтерергә яратыусы, йөрөмтәл

**ГУЛЯ́НКА** *ж*; *прост.* күңел асыу мәжлесе

**ГУЛЯ́НЬЕ** *с* **1.** *см.* **гуля́ть** 1; **2.** (*массовое празднество*) күмәк күңел асыу; **сего́дня состои́тся гуля́нье** бөгөн күмәк күңел асыу була

**ГУЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** (*совершать прогулку*) йөрөү; **гуля́ть в саду́** баҡсала йөрөү **2.** *разг.* (*иметь выходной*) буш тороу, ял итеү; **гуля́ть два дня** ике көн ял итеү **3.** *прост.* күңел асыу, типтереү, әйттереү; **гуля́ть на сва́дьбе** туйҙа типтереү **4.** *с кем*; *прост.* йөрөү, йөрөшөү (*ир-ат менән ҡатын-ҡыҙға ҡарата*)

**ГУЛЯ́Ш** *м*; *кул.* гуляш (*ашамлыҡ*); **гото́вить гуля́ш** гуляш әҙерләү

**ГУМАНИ́ЗМ** *м* **1.** гуманизм (*Яңырыу осоронда кешеләрҙе, уларҙың фекерен феодализм һәм католицизм бығауынан азат итеүгә йүнәлдерелгән прогрессив хәрәкәт*) **2.** (*любовь к людям*) гуманизм, кешелеклек

**ГУМАНИ́СТ** *м* **1.** *ист.* гуманист (*гуманизм вәкиле*) **2.** гуманист, кешелекле кеше

**ГУМАНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** гуманизм ...ы; **гуманисти́ческие иде́и** гуманизм идеялары **2.** гуманистик; **гуманисти́ческое отноше́ние к лю́дям** кешеләргә гуманистик мөнәсәбәт

**ГУМАНИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое гуманитар, ижтимағи; **гуманита́рные нау́ки** гуманитар фәндәр (*философия*, *тарих*, *филология һ.б.*)

**ГУМА́ННОСТЬ** *ж* гуманлылыҡ, кешелеклек; **прояви́ть гума́нность** кешелеклек күрһәтеү

**ГУМА́ННЫЙ,** -ая, -ое гуманлы, кешелекле; **гума́нный челове́к** кешелекле кеше

**ГУМНО́** *с* ырҙын, ырҙын табағы

**ГУ́МУС** *м*; *спец.* серемтә

**ГУ́ННЫ** *мн.* (*ед.* **гунн** *м*) һундар (*Урал тирәһендә II—IV бб. күсмә һәм урындағы ҡәбиләләрҙән ойошҡан күсмә халыҡ*)

**ГУ́РИЯ** *ж*; *миф.* хур ҡыҙы; **краси́вая как гу́рия** хур ҡыҙы кеүек матур

**ГУРМА́Н** *м* гурман, ашамһаҡ, тәмлетамаҡ (*кеше*)

**ГУРМА́НСТВО** *с* гурманлыҡ (*тәмле*, *татлы ашамлыҡтарға әүәҫлек*)

**ГУРТ** *м* көтөү, мал көтөүе; **гурт молодняка́** йәш мал көтөүе

**ГУРТОВО́Й,** -ая, -ое көтөү ...ы; **гуртово́й бригади́р** көтөү бригадиры

**ГУРТОВЩИ́К** *м* көтөү ҡыуыусы

**ГУРТО́М** *нареч.*; *разг.* **1.** көтөүе менән, тулайым; **покупа́ть гурто́м** көтөүе менән һатып алыу **2.** йыйнаулашып, барыһы бергә

**ГУРЬБА́** *ж*; *разг.* **1.** төркөм, көтөү (*кешеләргә ҡарата*) **2.** *в знач. нареч.* **гурьбо́й** йыйнаулашып, бергәләшеп; **идти́ гурьбо́й** йыйнаулашып барыу

**ГУСА́К** *м* ата ҡаҙ

**ГУСА́Р** *м* гусар (*революцияға тиклем Рәсәй армияһында һәм ҡайһы бер сит ил ғәскәрендә: венгр өлгөһөндәге форма кейгән кавалерия һалдаты*)

**ГУСА́РСКИЙ,** -ая, -ое гусар(ҙар) ...ы; **гуса́рский полк** гусарҙар полкы

**ГУ́СЕНИЦА** *ж* **1.** *зоол.* ҡарышлауыҡ (*күбәләк ҡорто*); **мохна́тая гу́сеница** йөнлө ҡарышлауыҡ **2.** тәгәрмәс (таҫмаһы) сылбыры (*тракторҙа, танкыла һ.б.*); **гу́сеницы тра́ктора** тракторҙың тәгәрмәс сылбыры

**ГУ́СЕНИЧНЫЙ,** -ая, -ое сылбырлы тәгәрмәсле; **гу́сеничный тра́ктор** сылбырлы тәгәрмәсле трактор

**ГУСЁНОК** *м* ҡаҙ бәпкәһе (себеше)

**ГУСИ́НЫЙ,** -ая, -ое ҡаҙ ...ы; **гуси́ное перо́** ҡаҙ ҡауырһыны; **гуси́ное яйцо́** ҡаҙ йомортҡаһы ♦ **гуси́ная ко́жа** ҡаҙ тәне (*өшөүҙән һ.б. тәндә барлыҡҡа килгән бөрсөктәр*); **гуси́ные ла́пки** күҙ төбөндәге йыйырсыҡтар

**ГУ́СЛИ** *мн.*; *муз.* көснә (*ике ҡул менән уйнай торған бороңғо ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ГУСЛЯ́Р** *м* көснәсе, көснәлә уйнаусы

**ГУСТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ҡуйырыу; **ка́ша густе́ет** бутҡа ҡуйыра; **тума́н густе́ет** томан ҡуйыра **2.** ҡуйыланыу, ҡалынайыу, ҡуйылана (ҡалыная) барыу; **лес густе́ет** урман ҡалыная бара

**ГУ́СТО 1.** *нареч.* ҡуйы, ҡуйы булып; **трава́ растёт гу́сто** үлән ҡуйы булып үҫә **2.** *нареч.* (*не жидко*) ҡаты, ҡаты итеп; **гу́сто замеси́ть те́сто** ҡамырҙы ҡаты баҫыу **3.** *в знач. сказ., безл.*; *разг.* (*много*) мул, күп; **не гу́сто** мул түгел

**ГУСТО́Й,** -ая, -ое ҡуйы, ҡалын; **густы́е во́лосы** ҡалын (ҡуйы) сәс; **густо́й лес** ҡалын (ҡуйы) урман; **густа́я ка́ша** ҡуйы бутҡа; **густа́я смета́на** ҡуйы ҡаймаҡ; **густо́й цвет** ҡуйы төҫ; **густы́е облака́** ҡуйы болоттар; **густо́й дым** ҡуйы төтөн; **густо́й го́лос** ҡалын тауыш

**ГУСТОЛИ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡуйы япраҡлы; **густоли́ственная берёза** ҡуйы япраҡлы ҡайын

**ГУСТОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *см.* **густоли́ственный**

**ГУСТОНАСЕЛЁННЫЙ,** -ая, -ое күп халыҡлы, халыҡ тығыҙ ултырған; **густонаселённая о́бласть** халыҡ тығыҙ ултырған өлкә

**ГУСТОПСО́ВЫЙ,** -ая, -ое (*о борзых собаках*) муйыны ҡуйы йөнлө

**ГУСТОТА́** *ж* ҡуйылыҡ, ҡалынлыҡ; **густота́ воло́с** сәстең ҡалынлығы (ҡуйылығы); **густота́ молока́** һөттөң ҡуйылығы; **густота́ ле́са** урмандың ҡалынлығы (ҡуйылығы)

**ГУСЫ́НЯ** *ж* инә ҡаҙ

**ГУСЬ** *м* ҡаҙ ♦ **гусь ла́пчатый** йылмаяҡ, йышылған кеше; **как с гу́ся вода́** *кому* ҡолағына ла элмәй, иҫе лә китмәй

**ГУСЬКО́М** *нареч.* бер-бер артлы теҙелешеп, аллы-артлы, эйәртенешеп

**ГУСЯ́ТИНА** *ж* ҡаҙ ите

**ГУСЯ́ТНИК** *м* **1.** ҡаҙҙар өсөн оя **2.** ҡарсыға

**ГУСЯ́ТНИЦА** *ж* **1.** ҡаҙ ҡараусы **2.** (*посуда*) оҙонса тәрән тимер һауыт (*ҡаҙҙы, өйрәкте тотош бешереү өсөн*)

**ГУТАЛИ́Н** *м* гуталин (*күн аяҡ кейемен таҙарта торған май*)

**ГУТТАПЕ́РЧА** *ж* гуттаперча (*ҡайһы бер үҫемлектең ҡатҡан һутынан алына торған каучук кеүек һығылмалы матдә*)

**ГУТТАПЕ́РЧЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** гуттаперча ...ы **2.** гуттаперча, гуттаперчанан яһалған; **гуттапе́рчевая игру́шка** гуттаперча уйынсыҡ

**ГУ́ЩА** *ж* **1.** ултырма, төпрә, ҡуйырыҡ, ҡуйы; **кофе́йная гу́ща** ҡәһүә ҡуйырығы **2.** (*чаща, дебри*) шырлыҡ; **гу́ща ле́са** урман шырлығы **3.** урта, эс; **в гу́ще толпы́** халыҡ төркөмө уртаһында; **в гу́ще собы́тий** ваҡиғалар эсендә ♦ **гада́ть на кофе́йной гу́ще** *см.* **гада́ть**

**ГЯУ́Р** *м*; *презр.* кафыр (*мосолмандарҙың башҡа диндәгеләрҙе атауы*)

# Д

**ДА I** *частица* **1.** (*при ответе для выражения согласия*) эйе, шулай; **все собрали́сь? — Да** бөтәһе лә йыйылдымы? — Эйе; **да, э́то ве́рно** эйе, был дөрөҫ

**2.** (*в вопр. предложении для побуждения собеседника к ответу*) -мы/-ме (ни), шулаймы ни, улаймы ни, эйеме; **он верну́лся, да?** ул ҡайттымы ни?; **ты э́того челове́ка хорошо́ зна́ешь, да?** һин был кешене яҡшы беләһең, шулаймы?

**3.** (*при неожиданном воспоминании о чём-л.*; *в значении "кстати", "вот ещё"*) әйткәндәй, эй; **да, ещё одна́ но́вость** әйткәндәй, тағы бер яңылыҡ; **да, совсе́м забы́л** эй, бөтөнләй онотҡанмын

**4.** (*при выражении недоверия, возражения в значении “как бы не так”*) эйе шул, -мағайы/-мәгәйе; **я тебе́ другу́ю кни́гу подарю́.— Да, пода́ришь ты!** мин һиңә икенсе китап бүләк итермен. — Эйе шул, бирерһең һин!

**5.** (*при призыве, пожелании*) -һын/-һен; **да здра́вствует дру́жба наро́дов!** йәшәһен халыҡтар дуҫлығы!

**6.** (*для выражения требования, приказания, настойчивой просьбы*) -һын/-һен, әйҙә (инде), -сы/-се, инде, әле; **да оберни́тесь вы** әйләнегеҙ әле; **да вы сади́тесь!** ултырһағыҙсы!, ултырығыҙ әле! ♦ **ай да** бына исмаһам; **вот э́то да!** китсе!, бына һиңә (кәрәк булһа)!; **ну да!**: 1) әлбиттә, һис шикһеҙ; **вы придёте? — Ну да!** һеҙ киләһегеҙме? — Әлбиттә!; 2) китсе! булмаҫ!; **он перее́хал в дере́вню. — Ну да!** ул ауылға күсеп киткән. — Китсе! Булмаҫ!

**ДА II** *союз* **1.** *соед.* (*для соединения однородных членов предложения и предложений; соответствует союзу “и”*) һәм, да/дә; **оте́ц да я** атай ҙа мин; **в лесу́ лишь берёза да оси́на** урманда тик ҡайын да уҫаҡ

**2.** *присоед.* (*для присоединения предложений или членов предложения, дополняющих высказанное*) өҫтәүенә, шуның өҫтөнә, тағы ла, етмәһә, етмәһә тағы; **сего́дня хо́лодно, да ещё дождь со сне́гом идёт** бөгөн көн һыуыҡ, өҫтәүенә ҡар ҡатыш ямғыр яуа

**3.** *противит.* (*для присоединения предложений или членов предложений со значением противопоставления; соответствует союзу “но”*) әммә, ләкин, да/дә; **знал, да не сказа́л** белһә лә әйтмәгән; **ма́ленький, да уда́ленький** бәләкәй генә булһа ла булдыҡлы, үҙенә күрә түгел ♦ **да и** (*при усилении соед. союза*) да/дә; **пойду́ да и вы́скажу** барам да әйтеп һалам; **да и то́лько** (*при усилении действия*) -да/-дә; **пла́чет да и то́лько**! илай ҙа илай!; **нет-нет да и** бер булмаһа — бер, әллә ниҙә бер, юҡ-юҡ та, һирәкмирәк булһа ла, юҡ тигәндә

**ДАВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **дать 2.** *повел.* **дава́й(те)** *разг.* әйҙә, әйҙәгеҙ, йәгеҙ, йә әле; **дава́йте споём** әйҙәгеҙ, йырлап алайыҡ **3.** *повел.* **дава́й**; *разг.* (*с неопр. формой глагола несов. вида; обозначает начало энергичного действия*) әйҙә -ырға/-ергә, тотондо, башланы; **а она́ дава́й бе́гать** ә ул йүгереп китмәһенме, ә ул әйҙә йүгерергә тотондо ♦ **дава́й бог но́ги** ҡойроҡто һыртҡа һалыу, үксә күтәреү; **дава́ть во́лю рука́м** ҡул күтәреү; **не дава́ть прохо́да (прохо́ду)** *кому* юлына арҡыры төшөү, эҙәрләү

**ДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **да́ться 2.** *страд. от* **дава́ть**

**ДА́ВЕЧА** *нареч.*; *прост.* бая, баяғы; **да́веча он звони́л** бая ул шылтыратты

**ДА́ВЕШНИЙ,** -яя, -ее *прост.* баяғы, әлеге; **да́вешний разгово́р** баяғы һөйләшеү

**ДАВИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое баҫа, баҫтыра (иҙә) торған; **дави́льный аппара́т** иҙә торған аппарат

**ДАВИ́ТЬ** *несов.* **1.** *на кого-что; прям., перен.* (*налегать тяжестью, оказывать нажим*) баҫыу, баҫым яһау; **снег да́вит на кры́шу** ҡар ҡыйыҡты баҫа; **тоска́ да́вит се́рдце** йөрәкте һағыш баҫа **2.** *что* (*жать, выжимать*) һығыу, иҙеү; **дави́ть виногра́д** виноград һығыу **3.** *когочто; прям., перен.* (*стискивать, сжимать*) ҡыҫыу; **сапо́г да́вит но́гу** итек аяҡты ҡыҫа; **дави́ть инициати́ву** инициативаны ҡыҫыу **4.** *кого; разг.* (*удавить*) быуыу, быуып үлтереү; **хорёк да́вит дома́шних птиц** көҙән йорт ҡоштарын быуа **5.** *что безл.* (*о чувстве боли*) ҡыҫыу, ҡыҫылыу; **мне да́вит грудь** күкрәгем ҡыҫыла **6.** *кого-что* (*топтать, убивать*) тапау, һытып (тапап) үлтереү; **дави́ть гу́сениц** ҡарышлауыҡтарҙы тапап үлтереү

**ДАВИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем* тамаҡҡа тороу, төйөлөү, ҡарлығыу, сәсәү; **дави́ться ко́стью** тамаҡҡа һөйәк тороу **2.** *от чего* быуылыу; **дави́ться от сме́ха** быуылып көлөү **3.** *прост.* ҡыҫылыу; **дави́ться в авто́бусе** автобуста ҡыҫылыу

**ДА́ВКА** *ж; разг.* ҡыҫылыш, этеш-төртөш; **да́вка у ка́ссы** касса янында этеш-төртөш

**ДАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **дави́ть** 1—3, 5; **2.** баҫым; **атмосфе́рное давле́ние** атмосфера баҫымы **3.** *перен.* баҫым, ҡыҫым, иҙеү; **ока́зывать давле́ние** *на кого-л. кемгәлер* баҫым яһау ♦ **под давле́нием** *кого-чего кемдеңдер* баҫымы арҡаһында (аҫтында); **кровяно́е давле́ние** ҡан баҫымы

**ДА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **дави́ть**

**ДА́ВЛЕНЫЙ,** -ая, -ое иҙелгән, һытылған, йәнселгән; **да́вленые помидо́ры** иҙелгән помидорҙар; **да́вленые я́йца** һытылған йомортҡалар

**ДА́ВНИЙ,** -яя, -ее **1.** күптәнге, әллә ҡасанғы; **да́вний слу́чай** күптәнге ваҡиға **2.** элекке, боронғо, күтәнге, иҫке; **в да́вние времена́** элекке ваҡытта; **да́вний друг** күптәнге дуҫ, иҫке дуҫ

**ДАВНИ́ШНИЙ,** -яя, -ее *разг. см.* **да́вний**

**ДАВНО́** *нареч.* **1.** әллә ҡасан, күптән; **я давно́ верну́лся** мин әллә ҡасан ҡайттым **2.** күптән, күптәнән, күптән (күптәнән) бирле, әллә ҡасан(дан бирле); **я его́ давно́ не ви́дел** мин уны күптәнән күргәнем юҡ ♦ **давно́ бы так** күптән шулай кәрәк ине

**ДАВНОПРОШЕ́ДШИЙ,** -ая, -ее күптән үтеп киткән, күптән булған, әллә ҡасанғы, әллә ҡасан булып үткән ♦ **давнопроше́дшее вре́мя** *грам.* күптән үткән заман

**ДА́ВНОСТЬ** *ж* **1.** күптән (булғанлыҡ) булыу, күптәнгелек; **да́вность собы́тия** ваҡиғаның күптән булыуы **2.** *юр.* ваҡыт һуҙымы, ҡуйылған ваҡыт; **исково́я да́вность** юллау ваҡыты үтеү, юллау өсөн ҡуйылған ваҡыт ♦ **за да́вностью лет** ваҡыты уҙып, күп йылдар үтеү сәбәпле; **без сро́ка да́вности** күпме ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан



9 зак. 2.0084.05

**ДАВНЫ́М-ДАВНО́** *нареч.*; *разг.* әллә ҡасан, борон заман, хан заманынан

**ДАГЕСТА́НСКИЙ,** -ая, -ое дағстан, Дағстан ...ы; **дагеста́нские языки́** Дағстан халыҡтарының телдәре

**ДАГЕСТА́НЦЫ** *мн.* дағстанлылар, Дағстан халҡы // *ед.* **дагеста́нец** *м* Дағстан ир-аты; **дагеста́нка** *ж* Дағстан ҡатын-ҡыҙы

**ДА́ЖЕ** *частица* **1.** (*для выделения и усиления слова или словосочетания, к которому относится*) хатта ... да/дә; **да́же я могу́ подня́ть** хатта мин дә күтәрә алам **2.** *в знач. союза* (*присоединяет члены предложения или предложения, обозначающие результат напряжённого действия или показатель высокой степени чего-л.*) хатта; **бы́ло о́чень тепло́, да́же жа́рко** ныҡ йылы, хатта эҫе ине

**ДАКТИЛОСКОПИ́Я** и **ДАКТИЛОСКО́ПИЯ** *ж* дактилоскопия (*криминалистика ғилеменең енәйәтсенең шәхесен билдәләү маҡсатында бармаҡ битендәге һыҙаларҙы өйрәнеү бүлеге*)

**ДА́КТИЛЬ** *м*; *лит.* дактиль (*силлабо-тоник шиғырҙа баҫымы беренсе ижеккә төшә торған өс ижекле стопа*)

**ДАЛА́Й-ЛА́МА** *м* далай-лама (*Тибетта иң юғары дин һәм хөкүмәт башлығы*)

**ДА́ЛЕЕ** *нареч. см.* **да́льше** 2, 3; **да́лее перейдём к разбо́ру ра́зных вопро́сов** артабан төрлө мәсьәләләрҙе тикшереүгә күсербеҙ ♦ **и так да́лее (и т.д.)** һәм башҡалар (һ.б.), һәм башҡа шуның кеүектәр (шундайҙар), һәм шулай уҡ; **не да́лее как**; **не да́лее чем**: 1) да/дә, ары (артыҡ) түгел; әле... ғына/генә; **не да́лее как вчера́** әле кисә генә; 2) да/дә ҡалмай (һуҙлатмай); **не да́лее как за́втра** иртәгәнән дә ҡалмай

**ДАЛЁКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*находящийся на большом расстоянии*) алыҫ, йыраҡ, ары, алыҫтағы, йыраҡтағы, алыҫта (йыраҡта) торған (ятҡан); **далёкий го́род** алыҫта ятҡан ҡала; **далёкие стра́ны** алыҫ илдәр **2.** (*отдалённый во времени*) әллә ҡасанғы, бик боронғо, алыҫта (йыраҡта, артта) ҡалған; **далёкое про́шлое** әллә ҡасанғы (күптән үткән) заман; **далёкие го́ды** йыраҡта ҡалған йылдар **3.** *перен.* ят, сит; **он показа́лся далёким и непоня́тным** ул миңә ят һәм аңлайышһыҙ булып күренде **4.** *перен.*, *разг.* (*только с отрицанием*) башлы, аҡыллы; **не о́чень далёкий челове́к** бик үк аҡыллы кеше түгел

**ДАЛЕКО́** и **ДАЛЁКО 1.** *нареч.*; *прям.*, *перен.* алыҫ, йыраҡ; **е́хать нам бы́ло ещё далеко́** беҙгә барырға әле йыраҡ ине; **де́тство оста́лось далеко́** бала саҡ алыҫта ҡалды **2.** *в знач. сказ.* оҙаҡ, алыҫ; **до рассве́та ещё далеко́** таң атырға оҙаҡ әле **3.** *кому-чему, до кого-чего в знач. сказ.*, *безл.* -рға/-ргә алыҫ, йыраҡ; **до него́ мне далеко́** уға етергә миңә алыҫ әле ♦ **далеко́ за** күптән уҙып киткән; **ему́ далеко́ за со́рок** ул күптән ҡырҡты уҙған; **уже́ далеко́ за́ полночь** төн уртаһы күптән үтеп киткән; **далеко́ зайти́** тәрәнгә китеү, ҡатмарлашыу; **де́ло зашло́ далеко́** эш бик тәрәнгә китте; **далеко́ не** бер ҙә, һис тә, бик үк, ул хәтле; **он далеко́ не глуп** ул бер ҙә аҡылһыҙ түгел; **далеко́ не уе́дешь (не уйдёшь)** *с чем, на чём* алыҫ (әллә ҡайҙа) китеп булмай, әллә ни ҡылып булмай; **далеко́ пойти́** юғары күтәрелеү, уңыштар яулау (*эштә, тормошта*)

**ДАЛЬ** *ж* **1.** (*далеко видимое расстояние*) алыҫлыҡ, йыраҡлыҡ, офоҡ; **да́льние да́ли** алыҫтағы офоҡтар **2.** *с указ.* и *опред. мест.*; *разг.* алыҫ ер; **в таку́ю даль е́хать** шундай алыҫ ергә барырға

**ДАЛЬНЕ́ЙШИЙ,** -ая, -ее артабанғы, алдағы, киләсәкке, киләсәктәге, бынан ары (һуң); **дальне́йший разгово́р бесполе́зен** артабанғы һөйләшеү файҙаһыҙ ♦ **в дальне́йшем**: 1) артабан, киләсәктә, алда, алдағы көндә; 2) түбәндә, бынан һуң

**ДА́ЛЬНИЙ,** -яя, -ее **1.** алыҫ, йыраҡ, алыҫтағы, йыраҡтағы; **да́льнее расстоя́ние** алыҫ ара; **капита́н да́льнего пла́вания** алыҫҡа йөҙә торған карап капитаны; **авиа́ция да́льнего де́йствия** алыҫ араға оса торған авиация **2.** (*о родственных отношениях*) алыҫ ҡәрҙәшлек, ете быуын; **да́льний ро́дственник** алыҫ ҡәрҙәш, алыҫ туған ♦ **без да́льних слов (разгово́ров)** күпкә һуҙмай, күп һөйләп тормай, уратып-сурытып тормай

**ДАЛЬНОБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* алыҫҡа (йыраҡҡа) атыусы; **дальнобо́йное ору́дие** алыҫҡа атыусы туп

**ДАЛЬНОВИ́ДНОСТЬ** *ж* алдан күреүсәнлек (күрә белеү)

**ДАЛЬНОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое алдан күреүсән (күрә белеүсе); **дальнови́дный челове́к** алдан күрә белеүсе кеше

**ДАЛЬНОЗО́РКИЙ,** -ая, -ое үтәғарашлы, яҡындан насар күреүсе, алыҫтан (йыраҡтан) яҡшы күреүсе

**ДАЛЬНОЗО́РКОСТЬ** *ж* үтәғараш, яҡындан насар күреү, алыҫтан яҡшы күреү

**ДАЛЬНОМЕ́Р** *м* алыҫлыҡты үлсәгес (*прибор*)

**ДА́ЛЬНОСТЬ** *ж* алыҫлыҡ, йыраҡлыҡ; **да́льность полёта** осоу алыҫлығы

**ДАЛЬТОНИ́ЗМ** *м* дальтонизм (*күҙҙең ҡайһы бер төҫтәрҙе айыра алмай торған күреү етешһеҙлеге*)

**ДАЛЬТО́НИК** *м*; *разг.* дальтоник (*дальтонизм менән ауырыусы*)

**ДА́ЛЬШЕ 1.** *сравн. ст. от* **далёкий** 1, 2, 4 и **далеко́**; **мы от це́нтра живём да́льше, чем вы** беҙ үҙәктән һеҙгә ҡарағанда алыҫыраҡ торабыҙ **2.** *нареч.* (*затем*) артабан, унан ары, унан (шунан) һуң; **да́льше что бы́ло, не по́мню** унан ары ни булғанын иҫләмәйем **3.** *нареч.* (*продолжая начатое*) артабан, ары, тағы ла; **расска́зывать да́льше** артабан һөйләү ♦ **да́льше — бо́льше** бар-

ған һайын (киҫкенләшеү); **да́льше (е́хать) не́куда** *прост.* берәй нәмәнең сигенә килеп етеү (тәрәлеү), башҡа сара юҡ; **не да́льше как**; **не да́льше чем** ҡасан ғына әле

**ДА́МА** *ж* **1.** *уст.* ханым, бикә **2.** (*в танце*) дама **3.** *карт.* дама ♦ **да́ма се́рдца** *шутл.* йән һөйгән, һөйгән йәр

**ДАМА́ССКИЙ,** -ая, -ое димәшке ...ы ♦ **дама́сская сталь** димәшке ҡоросо (*айырым юғары сорт*)

**ДА́МБА** *ж* дамба (*һыу баҫыуҙан һаҡлау, һыу бүлеү йәки һыу баҫа торған урындарға юл һалыу өсөн һалынған ныгытма*)

**ДА́МКА** *ж* дамка (*шашка уйынында*)

**ДАМО́КЛОВ: дамо́клов меч** *книжн.* һәр ваҡыт баш осонда торған ҡурҡыныс, ҡыл өҫтөндә (ҡурҡыныс аҫтында) булыу; **быть под дамо́кловым мечо́м** даими ҡурҡыныс аҫтында булыу

**ДА́МСКИЙ,** -ая, -ое ҡатын-ҡыҙ ...ы; **да́мское пальто́** ҡатын-ҡыҙ пальтоһы; **да́мский портно́й** ҡатын-ҡыҙ кейеме тегеүсе

**ДА́ННИК** *м*; *ист.* яһаҡ (һалым) түләүсе

**ДА́ННЫЕ** *только мн.* **1.** мәғлүмәттәр; **анке́тные да́нные** анкета мәғлүмәттәре; **по непо́лным да́нным** тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса **2.** дәлилдәр, нигеҙҙәр; **нет доста́точных да́нных** етерлек дәлилдәр юҡ **3.** сифат, һәләтлек, мөмкинлек; **артисти́ческие да́нные** артислыҡ һәләтлеге

**ДА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **дать 2.** *прил.* нәҡ шул, ошо, хәҙерге, был, әлеге, ошо мәлдә ♦ **да́нная (величина́)** *мат.* билдәле (бирелгән) дәүмәл

**ДА́НСИНГ** *м* дансинг (*сит илдәрҙә тансалар залы*)

**ДАНТИ́СТ** *м*; *уст.* дантист, теш врачы (технигы)

**ДАНЬ** *ж* **1.** *ист.* яһаҡ; **взима́ть дань** яһаҡ алыу **2.** *перен.*, *книжн.* тейешле баһа, хөрмәт, ҡәҙер, ихтирам; **принести́ дань уваже́ния** ихтирам күрһәтеү **3.** *чему*; *перен.* (*уступка*) эйәреү; **дань мо́де** модаға эйәреү ♦ **отдава́ть дань** *кому-чему* байын ҡайтарыу, тейешле баһа биреү

**ДАР** *м* **1.** бүләк; **принима́ть дар** бүләк ҡабул итеү **2.** һәләт, һәләтлек, оҫталыҡ, талант; **поэти́ческий дар** шиғри һәләт **3.** *мн.* **дары́** байлыҡ(тар); **дары́ приро́ды** тәбиғәт байлыҡтары ♦ **дар сло́ва (ре́чи)** телгә һәләтлек, һөйләү оҫталығы

**ДАРВИНИ́ЗМ** *м* дарвинизм, Дарвин тәғлимәте

**ДАРВИНИ́СТ** *м* дарвинсы, Дарвин тәғлимәтен яҡлаусы (таратыусы)

**ДАРГИ́НСКИЙ,** -ая, -ое дарғын ...ы; **дарги́нский язы́к** дарғын теле

**ДАРГИ́НЦЫ** *мн.* дарғындар, дарғын халҡы (*Дағстанда йәшәйҙәр*) // *ед.* **дарги́нец** *м* дарғын ир-аты; **дарги́нка** *ж* дарғын ҡатын-ҡыҙы

**ДАРЕ́НИЕ** *с*; *книжн. см.* **дари́ть**

**ДАРЁНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бүләк ителгән, бүләккә бирелгән ♦ **дарёному коню́ в зу́бы не смо́трят** биргәндең тышына ҡарамайҙар, бүләктең хаҡын һорамайҙар

**ДАРИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кому-чему, кого-что* бүләк итеү, бүләк итеп биреү, һыйлау; **дари́ть де́вушке цветы́** ҡыҙға сәскә бүләк итеү **2.** *кого, чем*; *перен.* (*удостаивать, награждать*) иғтибар биреү (күрһәтеү, бүлеү); **дари́ть внима́нием** иғтибар күрһәтеү

**ДАРМОВО́Й,** -ая, -ое *прост.* бушлай, түләүһеҙ, бушҡа килгән; **дармово́й хлеб** буштан килгән икмәк

**ДАРМОВЩИ́НА** и **ДАРМОВЩИ́НКА: на дармовщи́ну** *прост.* бушлайға, түләүһеҙгә, көс түкмәй

**ДАРМОЕ́Д** *м*; *разг.* әрәмтамаҡ, кеше елкәһендә йәшәүсе, һоро ҡорт

**ДАРМОЕ́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* әрәмтамаҡ булыу, кеше елкәһендә йәшәү, эшләмәй ятыу

**ДАРМОЕ́ДСТВО** *с*; *разг.* әрәмтамаҡлыҡ, кеше елкәһендә йәшәгәнлек

**ДАРОВА́НИЕ** *с* **1.** *уст. см.* **дарова́ть 2.** һәләт, талант; **литерату́рное дарова́ние** әҙәби һәләт; **приро́дное дарова́ние** тәбиғи һәләт

**ДАРОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что*; *уст.*, *высок.* бүләк итеү ♦ **дарова́ть жизнь** үлем язаһынан азат итеү, енәйәтен (гәйебен) ғәфү итеү; **дарова́ть свобо́ду** ирек биреү, ирекккә сығарыу

**ДАРОВИ́ТОСТЬ** *ж* һәләтлелек, талантлылыҡ, зирәклек

**ДАРОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое һәләтле, талантлы, зирәк; **дарови́тый поэ́т** һәләтле шағир

**ДАРОВО́Й,** -ая, -ое *разг.* бушлай, түләүһеҙ, бушҡа төшкән (килгән); **дарово́й прое́зд** бушлай йөрөү; **дарово́й хлеб** бушҡа килгән (әҙер) икмәк

**ДА́РОМ** *нареч.* **1.** буш, бушлай, бушҡа, түләүһеҙ; **получи́ть да́ром** бушҡа алыу **2.** *разг.* осһоҙ, арзан; **купи́ть да́ром** арзан алыу **3.** әрәмгә, тиккә, юҡҡа, бушҡа (ғына), файҙаһыҙға; **потеря́ть вре́мя да́ром** ваҡытты әрәмгә үткәреү ♦ **да́ром не пройдёт (не обойдётся)** *что, кому* буш ҡына үтмәҫ, былай ғына ҡалмаҫ (*аҙағы насар булыр*); **да́ром что** *в знач. уступ. союза* булһа ла, булыуға ҡарамаҫтан; **да́ром что сла́бая же́нщина** сибек кенә (хәлһеҙ) ҡатын булыуына ҡарамаҫтан

**ДА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* бүләккә бирелгән, бүләк ителгән; **да́рственные ве́щи** бүләк ителгән нәмәләр **2.** бүләк ...ы, бүләк итеү ...ы; **да́рственная за́пись** бүләк яҙыуы **3.** *в знач. сущ.* **да́рственная** *ж*; *юр.* мөлкәтте бүләк итеү ҡағыҙы

**ДА́ТА** *ж* дата (*билдәле бер көн*); **истори́ческие да́ты** тарихи даталар

**ДА́ТЕЛЬНЫЙ: да́тельный паде́ж** *грам.* төбәү килеш

**ДАТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **дати́ровать**

**ДАТИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **дати́ровать 2.** *прил.* даталанған, көнө билдәләнгән; **дати́рованная ру́копись** даталанған ҡулъяҙма

**ДАТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* даталау, дата ҡуйыу, датаһын билдәләү (күрһәтеү); **дати́ровать заявле́ние** ғаризаға дата ҡуйыу

**ДАТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* даталаныу, -ға/-гә ҡарай, менән билдәләнеү; **па́мятник дати́руется деся́тым ве́ком** ҡомартҡы унынсы быуатҡа ҡарай

**ДА́ТСКИЙ,** -ая, -ое дат ...ы, Дания ...ы; **да́тский язы́к** дат теле

**ДАТЧА́НЕ** *мн.* даттар, дат халҡы // *ед.* **датча́нин** *м* дат ир-аты; **датча́нка** *ж* дат ҡатын-ҡыҙы

**ДА́ТЧИК** *м*; *тех.* датчик (*механизмдың эшен тикшерә торған прибор*)

**ДАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* биреү, биреп тороу; **дать кни́гу почита́ть** китапты уҡырға биреп тороу; **за э́ту вещь ты ско́лько дал?** был нәмә өсөн һин күпме бирҙең?; **дать о́рден посме́ртно** орденды үлгәндән һуң биреү; **дать взаймы́** бурысҡа биреү **2.** *что* (*устроить, организовать*) ойоштороу; **дать обе́д в честь юбиля́ра** юбиляр хөрмәтенә мәжлес ойоштороу **3.** *кого-что* (*предоставить*) биреү; **дать кварти́ру** фатир биреү; **дать зе́млю аренда́торам** ҡуртымсыларға ер биреү **4.** *разг.* (*определить возраст*) биреү; **ему́ нельзя́ дать бо́льше сорока́ лет** уға ҡырҡ йәштән дә артыҡ биреп булмай **5.** *что* (*поручить*) биреү, ҡушыу; **дать тру́дное зада́ние** ауыр эш биреү **6.** *что* (*показать*) биреү, күрһәтеү; **дать интере́сный конце́рт** ҡыҙыҡлы концерт биреү **7.** *что* (*принести как результат*) биреү, килтереү; **дать дохо́д** килем (уңыш) биреү; **дать хоро́ший урожа́й** яҡшы уңыш биреү **7.** *что* (*произвести, сделать*) биреү; **дать залп** залп биреү; **дать сигна́л** сигнал биреү **9.** (*о появлении чего-л. в чём-л.*) барлыҡҡа килеү, хасил булыу, -ланыу/-ләнеү; **дать оса́док** төбөнә ултырыу, һарҡынды барлыҡҡа килеү; **дать тре́щину** ярыҡ барлыҡҡа килеү, ек хасил булыу; **дать течь** һыу аға башлау; **дать осе́чку** атылмау, сағылмау **10.** *с неопр.* (*позволить*) ирек (мөмкинлек) биреү, рөхсәт итеү; **дать во́лю чу́вствам** тойғоларға ирек биреү; **не дать спать** йоҡларға ирек бирмәү; **дать вы́сказаться** һөйләргә рөхсәт итеү **11.** *повел.* (*в знач. побудит. частицы*) ҡайҙа, ҡана; **дай отдохну́** ҡана, ял итеп алайым әле; **дай я сам пойду́** ҡана, үҙем барайым әле ♦ **дать во́лю рука́м** ҡулды оҙайтыу, ҡулсырланыу; **дать доро́гу** *кому* юл күрһәтеү, тормош юлына сығарыу; **дать жизнь** йән биреү, бала тыуҙырыу; **дать за́навес** шаршау төшөрөү; **дать знать** белгертеү, хәбәр итеү; **дать кля́тву** ант итеү; **дать ма́ху**: 1) һынатыу; 2) бирешеү; **дать нача́ло** *чему* башлап ебәреү, башланғысы булыу; **дать поня́ть** аңғартыу, һиҙҙереү; **дать свет** яҡтылыҡ (ут) биреү, яҡтыртыу; **дать себе́ труд** тырышып ҡарау, үҙеңде ышандырыу; **дать сло́во**: 1) *кому* берәйһенә һөйләргә һүҙ биреү; 2) вәғәҙә (һүҙ) биреү; **дать стрекача́ (тя́гу)** табан ялтыратыу, шылыу; **дать уро́к** *кому* һабаҡ (кәрәген) биреү, арт һабағын уҡытыу; **дать шпо́ры** ҡабаландырыу, тиҙләтеү; **как пить дать** һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ; **не дать в оби́ду** арҡалау, яҡлашыу; **ни дать ни взять** тап (тас), һуйып ҡаплаған; **он тебе́ даст!** (*угроза*) ул һинең кәрәгеңде бирер!; **я тебе́ дам!** кәрәгеңде бирермен!

**ДА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** бирелеү, тотолоу; **он не да́лся врагу́** ул дошманға бирелмәне **2.** *перен.* (*поддаться*) тотторо у, бирешеү, алдатыу; **не да́ться обма́ну** алдыҡҡа бирелмәү; алданмау, үҙеңде алдатмау **3.** *кому* (*легко усвоиться*) анһат үҙләштереү, еңел бирелеү; **матема́тика дала́сь ему́ легко́** уға математика еңел бирелде **4.** *кому только прош. вр.*; *неодобр.* ни кәрәге булыу; **дала́сь тебе́ э́та ку́кла!** ни кәрәге булды һиңә был ҡурсаҡтың! ♦ **ди́ву да́ться** ғәжәп итеү, иҫ китеү

**ДА́ЧА I** *ж* **1.** *см.* **дать** 1—9; **да́ча показа́ний** *юр.* мәғлүмәттәр биреү, һөйләп биреү **2.** (*порция*) бирем, биреү, бер тапҡыр бирерлек; **овса́ оста́лось на две да́чи** ике бирем (бирерлек) һоло ҡалды

**ДА́ЧА II** *ж* дача, кирәк (*ҡаланан ситтә һалынған йорт, баҡса йорто*); **жить на да́че** дачала йәшәү

**ДА́ЧА III** *ж* дача (*урман янындағы ер бүлеме*)

**ДА́ЧА IV** *ж*; *ист.* дайса, дача (*революцияға тиклем Рәсәйҙә башҡорт ҡәбилә-ырыуҙарының аҫаба ер биләмәләре*); **башки́рские да́чи** башҡорт аҫаба дайсалары

**ДА́ЧНИК** *м* и **ДА́ЧНИЦА** *ж* дачала тороусы, дачаға йөрөүсе

**ДА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое дача ...ы; **да́чный уча́сток** дача ере

**ДВА** *м* и *с* (две *ж*) *числ.* **1.** ике; **два ма́льчика** ике малай; **две де́вочки** ике ҡыҙыҡай **2.** (*оценка*) икеле, ике билдәһе ♦ **в два счёта** *прост.* бик тиҙ, “һә” тигәнсе; **в двух слова́х** бер-ике һүҙ менән, ҡыҫҡа ғына итеп; **в двух шага́х** бик яҡын, яп-яҡын, ике аҙымда ғына; **два сапога́ па́ра** икеһе бер иш, пар килгәндәр

**ДВАДЦАТИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) егерме йыл **2.** (*годовщина*) егерме йыллыҡ, егерме йыл тулыу; **двадцатиле́тие институ́та** институттың егерме йыллығы

**ДВАДЦАТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** егерме йыллыҡ, егерме йыл барған (һуҙылған); **двадцатиле́тний стаж** егерме йыллыҡ стаж; **двадцатиле́тняя борьба́** егерме йылға һуҙылған көрәш **2.** (*о возрасте*) егерме йәшлек

**ДВАДЦА́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* егерменсе; **двадца́тые го́ды** егерменсе йылдар

**ДВА́ДЦАТЬ** *числ.* егерме; **два́дцать рубле́й** егерме һум

**ДВА́ЖДЫ** *нареч.* **1.** ике рәт (мәртәбә, тапҡыр, ҡат); **сказа́ть два́жды** ике мәртәбә әйтеү **2.** (*при умножении*) икең, ике ерҙә; **два́жды два — четы́ре** ике икең дүрт ♦ **как два́жды два (четы́ре)** ап-асыҡ, бик аңлайышлы

**ДВЕ** *ж числ. см.* **два**

**ДВЕНАДЦАТИПЕ́РСТНЫЙ: двенадцатипе́рстная кишка́** *анат.* бөйән (*эсәк*)

**ДВЕНА́ДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун икенсе; **двена́дцатый час** сәғәт ун икенсе

**ДВЕНА́ДЦАТЬ** *числ.* ун ике; **двена́дцать ученико́в** ун ике уҡыусы

**ДВЕ́РКА** *ж*; *уменьш. от* **дверь**

**ДВЕРНО́Й,** -ая, -ое ишек ...ы; **дверно́й képя́к** ишек яңағы

**ДВЕ́РЦА** *ж* **1.** бәләкәй ишек **2.** ҡапҡас, япма; **печна́я две́рца** мейес ҡапҡасы

**ДВЕРЬ** *ж* ишек; **двуство́рчатая дверь** ике яҡҡа асмалы ишек; **запере́ть дверь** ишек бикләү; **стоя́ть в дверя́х** ишек төбөндә тороу; **стуча́ть в дверь** ишек шаҡыу ♦ **дверь в дверь** ҡара-ҡаршы, тупһаға-тупһа, ишеккә-ишек (тороу); **день откры́тых двере́й** асыҡ ишектәр көнө; **при закры́тых дверя́х** эше һәм вазифаһы буйынса тейешле кешеләр менән генә (үткәреү); **при откры́тых дверя́х** теләгән бер кешене индереп; **у двере́й** яҡында, эргәлә, ишек төбөндә; **указа́ть на дверь** *кому* ҡыуып сығарыу; **ломи́ться в откры́тую дверь** бәхәсһеҙ нәмәне раҫлап (иҫбатлап) маташыу, асыҡ ишеккә емереп инеү

**ДВЕ́СТИ** *числ.* ике йөҙ; **две́сти рубле́й** ике йөҙ һум

**ДВИ́ГАТЕЛЬ** *м* **1.** *тех.* двигатель; **дви́гатель вну́треннего сгора́ния** эске яныулы двигатель; **раке́тный дви́гатель** ракета двигателе **2.** *чего*; *перен.* этәргес, алға әйҙәүсе (этәреүсе, һөрөүсе); **нау́ка — дви́гатель прогре́сса** фән — прогресс этәргесе

**ДВИ́ГАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хәрәкәт ...ы, хәрәкәтләндереүсе, хәрәкәткә килтереүсе; **дви́гательные не́рвы** *анат.* хәрәкәт нервылары; **дви́гательные си́лы** хәрәкәтләндереүсе көстәр

**ДВИ́ГАТЬ** *несов.* **1.** *что* (*перемещать*) шылдырыу, шыуҙырыу, ҡуҙғатыу, күсереү; **дви́гать шкаф** шкафты шылдырыу; **дви́гать рука́ми** ҡул менән шылдырыу **2.** *чем* (*шевелить*) ҡыбырлатыу, һелкетеү, ҡыймылдатыу; **дви́гать па́льцами** бармаҡтарҙы ҡыбырлатыу **3.** *кого-что* (*направлять*) алып барыу, ебәреү, йүнәлдереү; **дви́гать войска́ к фро́нту** ғәскәрҙәрҙе фронтҡа йүнәлдереү **4.** *что*; *перен.* (*содействовать развитию*) алға (барыу, ебәреү) һөрөү; **дви́гать нау́ку вперёд** фәнде алға ебәреү **5.** *что* йөрөтөү, ҡуҙғатыу, хәрәкәтләндереү, хәрәкәткә килтереү; **пружи́на дви́гает часово́й механи́зм** сәғәт механизмын пружина хәрәкәтләндерә **6.** *кем-чем* (*побуждать*) рухландырыу, йөрөтөү, ҡуҙғатыу, сәбәп булыу; **и́ми дви́жет чу́вство милосе́рдия** уларҙы шәфҡәтлек тойғоһо йөрөтә

**ДВИ́ГАТЬСЯ** *несов.* **1.** (*перемещаться*) хәрәкәт итеү, йөрөү, барыу; **стре́лки дви́гаются по цифербла́ту** сәғәт уғы циферблат буйлап йөрөй **2.** (*шевелиться*) ҡыбырлау, ҡуҙғалыу, ҡыймылдау; **не дви́гайся** ҡуҙғалма, ҡыймылдама **3.** *разг.* (*отправляться*) ҡуҙғалыу, сығыу, һелкенеү, сығып китеү; **дви́гаться в путь** юлға сығып китеү **4.** *перен.* күтәрелеү, үҫеү, үрләү; **дви́гаться по слу́жбе** хеҙмәт буйынса күтәрелеү **5.** *страд. от* **дви́гать** 1, 3—5

**ДВИЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *в разн. знач.* хәрәкәт, йөрөш, йөрөү; **движе́ние рук и ног** ҡул-аяҡ хәрәкәте; **враща́тельное движе́ние** *физ.* әйләнмәле хәрәкәт; **равноме́рное движе́ние** бер тигеҙ (бер төрлө) хәрәкәт; **лежа́ть без движе́ния** хәрәкәтһеҙ ятыу; **привести́ в движе́ние** хәрәкәткә килтереү; **движе́ние авто́бусов** автобустар йөрөшө; **пра́вила доро́жного движе́ния** юл хәрәкәте ҡағиҙәләре; **движе́ние сторо́нников ми́ра** тыныслыҡ яҡлылар хәрәкәте; **национа́льно-освободи́тельное движе́ние** милли-азатлыҡ хәрәкәте **2.** барыш, ағыш; **движе́ние собы́тий** ваҡиғалар барышы **3.** үҫеш, үҙгәреш; **движе́ние народонаселе́ния** халыҡ һанының үҙгәреше

**ДВИ́ЖИМОСТЬ** *ж*; *юр.* күсмә милек; **прода́ть дви́жимость** күсмә милекте һатыу

**ДВИ́ЖИМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **дви́гать** 3, 4; **2.** *прил.* күсерелә торған, күсерелеүсе, күсермәле **3.** *прил.*; *перен.* дәртләнгән, рухланған, дәрт (рух) алған; **дви́жимый чу́вством любви́** мөхәббәт менән рухланған ♦ **дви́жимое иму́щество** *юр.* күсмә милек

**ДВИЖО́К** *м* движок (**1.** *күсәр хәрәкәтенә әйләнә торған механизм өлөшө* **2.** *һөйл. бәләкәй генә күсмә двигатель* **3.** *һөйл. урамдарҙа ҡар ҡырыу өсөн киң ағас көрәк*)

**ДВИ́ЖУЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **дви́гать 2.** *прил.* (*направляющий*) әйҙәүсе, алға этәреүсе, йүнәлеш биреүсе; **дви́жущие си́лы револю́ции** ихтилалды алға этәреүсе көстәр

**ДВИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *см.* **дви́гать** 1—4; **дви́нуть с мёртвой то́чки** тик торған нөктәнән (хәлдән) ҡуҙғалтыу, хәрәкәткә килтереү **2.** *кого* и *без доп.*; *прост.* (*с силой ударить*) тондороу, һалып осороу, һуғып ебәреү

**ДВИ́НУТЬСЯ** *сов. см.* **дви́гаться**

**ДВО́Е** *числ. собир.* **1.** *с сущ. мужского и общего р., имеющими только мн. ч., а также с личн. мест. во мн. ч.* ике, икәү; **дво́е дете́й** ике бала; **дво́е су́ток** ике тәүлек; **дво́е часо́в** ике сәғәт; **нас двои́х** беҙ икәүҙе **2.** *с парными сущ.* ике (пар); **дво́е сапо́г** ике пар итек; **дво́е глаз** ике күҙ ♦ **на свои́х (на) двои́х** *шутл.* пар турыны егеп (*йәйәүләү*)

**ДВОЕБО́РЕЦ** *м*; *спорт.* ике төр спортсы, икебәйгесе

**ДВОЕБО́РЬЕ** *с*; *спорт.* ике төр ярыш, икебәйге; **лы́жное двоебо́рье** саңғы буйынса ике төр ярыш, саңғы буйынса икебәйге

**ДВОЕВЛА́СТИЕ** *с* ике властылыҡ; **установле́ние двоевла́стия** ике властылыҡ урынлашыу

**ДВОЕДУ́ШИЕ** *с*; *уст.* ике йөҙлөлөк

**ДВОЕЖЕ́НЕЦ** *м* ике ҡатынлы кеше

**ДВОЕЖЁНСТВО** *с* ике ҡатын алыу, ике ҡатын менән тороу

**ДВОЕТО́ЧИЕ** *с* ике нөктә; **поста́вить двоето́чие** ике нөктә ҡуйыу

**ДВО́ЕЧНИК** *м* и **ДВО́ЕЧНИЦА** *ж*; *разг.* икелегә (икегә) уҡыусы, өлгәшмәүсе

**ДВОИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*раздваиваться*) икегә бүленеү (айырылыу); **доро́га двои́лась** юл икегә айырыла ине **2.** (*видеться удвоенным*) ике (ҡуш) булып күренеү; **двои́ться в глаза́х** *безл.* күҙгә ҡуш булып күренеү

**ДВО́ЙКА** *ж* **1.** (*цифра*) ике, ике һаны; **написа́ть дво́йку** ике һанын яҙыу **2.** (*оценка*) икеле, икеле билдәһе **3.** *карт.* икелек **4.** ике ишкәкле кәмә

**ДВОЙНИ́К** *м* **1.** *кого, чей* оҡшаш кеше **2.** *разг.* игеҙәктәрҙең һыңары **3.** ҡуш; **оре́х-двойни́к** ҡуш сәтләүек

**ДВОЙНО́Й,** -ая, -ое **1.** икеләтә; **двойно́й расхо́д** икеләтә сығым **2.** (*из двух частей*) ике ҡатлы; **двойны́е ра́мы** ике ҡатлы рам; **двойно́е дно** ике ҡат төп **3.** (*двойственный*) ике йөҙлө (төрлө), ике яҡлы; **двойна́я игра́** ике төрлө эш итеү, ике яҡҡа ла ярап эшләү; **вести́ двойну́ю поли́тику** ике яҡлы сәйәсәт алып барыу ♦ **двойна́я бухгалте́рия** иҫәп операцияһын ике төрлө сағылдырған бухгалтерия

**ДВО́ЙНЯ** *ж* игеҙ, игеҙәк балалар

**ДВОЙНЯ́ШКА** *ж*; *разг.* **1.** игеҙәктәрҙең һәр береһе **2.** *см.* **двойча́тка**

**ДВО́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** (*противоречивость*) ике төрлөлөк, ҡаршылыҡлы булыу, ҡапма-ҡаршылыҡ; **дво́йственность взгля́дов** фекерҙәрҙең ҡапма-ҡаршылығы **2.** (*двуличность*) ике төрлө (яҡлы) булыу, икеләнеү, аумаҡайланыу; **дво́йственность де́йствий** ике төрлө эш итеү (йөрөтөү), аумаҡайланыу

**ДВО́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*противоречивый*) ҡаршылыҡлы; **дво́йственные взгля́ды** ҡаршылыҡлы фекерҙәр **2.** (*двуличный*) ике йөҙлө, ике төрлө (яҡлы), икеле-микеле, аумаҡай; **дво́йственная поли́тика** ике яҡлы сәйәсәт

**ДВОЙЧА́ТКА** *ж*; *разг.* ҡуш (*сәтләүек, тубырсыҡ һ.б.*)

**ДВОР I** *м* **1.** ишек алды, ихата; **въе́хать во двор** ишек алдына инеү **2.** йорт, хужалыҡ; **село́ в две́сти дворо́в** ике йөҙ хужалыҡтан торған ауыл **3.** ҡура; **колхо́зный двор** колхоз ҡураһы; **ско́тный двор** мал ҡураһы ♦ **гости́ный двор** сауҙа йорто, каруанһарай; **моне́тный двор** аҡса һуғыу йорто; **ко двору́ (быть, прийти́сь)** уңыу, килешеү, тура килеү; **на дворе́** урамда, тышта

**ДВОР II** *м* һарай, һарай даирәһе; **ца́рский двор** батша һарайы даирәһе; **быть при дворе́** һарай даирәһендә булыу

**ДВОРЕ́Ц** *м* һарай; **Дворе́ц культу́ры** Мәҙәниәт һарайы; **Дворе́ц съе́здов** Съездар һарайы

**ДВОРЕ́ЦКИЙ** *м* баш лакей, дворецкий (*байҙар йортонда баш хеҙмәтсе*)

**ДВО́РНИК** *м* дворник (**1.** *урам һепереүсе* **2.** *автомашиналарҙың алғы быялаһын таҙарта торған ҡулайлама*)

**ДВО́РНЯ** *ж собир.*; *уст.* баяр йортондағы хеҙмәтселәр

**ДВОРНЯ́ГА** и **ДВОРНЯ́ЖКА** *ж*; *разг.* йорт эте (*нәҫелһеҙ эт*)

**ДВОРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** йорт ...ы; **дворо́вые постро́йки** йорт ҡаралтылары **2.** *уст.* хеҙмәтсе (*баяр йортонда*); **дворо́вые лю́ди** хеҙмәтсе кешеләр

**ДВОРЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое һарай ...ы; **дворцо́вая пло́щадь** һарай (алды) майҙаны

**ДВОРЯНИ́Н** *м* и **ДВОРЯ́НКА** *ж* дворян

**ДВОРЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое дворяндар ...ы; **дворя́нское сосло́вие** дворяндар ҡатламы

**ДВОРЯ́НСТВО** с **1.** (*сословие и звание*) дворянлыҡ **2.** *собир.* дворяндар

**ДВОЮ́РОДНЫЙ,** -ая, -ое ике туған; **двою́родный брат** (*старший*) ике туған ағай; **двою́родный брат** (*младший*) ике туған эне; **двою́родная сестра́** (*старшая*) ике туған апай; **двою́родная сестра́** (*младшая*) ике туған һеңле

**ДВОЯ́КИЙ,** -ая, -ое ике төрлө (яҡлы, яҡлап); **двоя́кое значе́ние** ике төрлө мәғәнә; **двоя́кая по́льза** ике яҡлап файҙа

**ДВОЯ́КО** *нареч.* ике төрлө, ике юл менән; **зада́чу мо́жно реши́ть двоя́ко** мәсьәләне ике төрлө сисеп була; **его́ слова́ мо́жно поня́ть двоя́ко** уның һүҙҙәрен ике төрлө аңларға була

**ДВОЯКОВО́ГНУТЫЙ,** -ая, -ое ике яғы ла батынҡы (*эскә ҡарай бөгөлгән*); **двояково́гнутое стекло́** ике яғы ла батынҡы быяла

**ДВОЯКОВЫ́ПУКЛЫЙ,** -ая, -ое ике яғы ҡабарынҡы (*тышҡа ҡабартып бөгөлгән*); **двояковы́пуклая жесть** ике яғы ҡабарынҡы ҡалай

**ДВОЯКОДЫ́ШАЩИЕ** *мн.*; *зоол.* ике төрлө һулаусылар (*айғолаҡ һәм үпкә менән тын алыусы балыҡтар төрө*)

**ДВУ...** и **ДВУХ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ике" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **двуго́рбый** ике үркәсле

**ДВУБО́РТНЫЙ,** -ая, -ое ике яҡ ҡаптырмалы; **двубо́ртное пальто́** ике яҡ ҡаптырмалы пальто

**ДВУГЛА́ВЫЙ,** -ая, -ое ике башлы ♦ **двугла́вая мы́шца** *анат. см.* **би́цепс**; **двугла́вый орёл** сәмреғош (*Рәсәй гербындағы символ*)

**ДВУГО́РБЫЙ,** -ая, -ое ике үркәсле, ҡапсаҡ; **двуго́рбый верблю́д** ике үркәсле дөйә

**ДВУГРА́ННЫЙ,** -ая, -ое ике (яҡлы) ҡырлы; **двугра́нный у́гол** ике ҡырлы мөйөш

**ДВУГРИ́ВЕННЫЙ** *м*; *разг.* егерме тин(лек), егерме тинлек аҡса

**ДВУДО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ике өлөшлө, ике өлөштән торған; **двудо́льные расте́ния** ике өлөшлө үҫемлектәр **2.** *в знач. сущ.* **двудо́льные** *мн.*; *бот.* ике өлөшлөләр (*орлоҡ төрө*)

**ДВУДО́МНЫЙ** -ая, -ое *бот.* ике өйлө; **двудо́мные расте́ния** ике өйлө үҫемлектәр (*инәлек һәм аталыҡ сәскәләре айырым үҫемлектә урынлашҡан, мәҫ., һырғанаҡ*)

**ДВУЖИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* әрһеҙ, ныҡ, сыҙам; **двужи́льный челове́к** сыҙам (ныҡ) кеше

**ДВУЗНА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ике урынлы; **двузна́чное число́** ике урынлы һан **2.** ике мәғәнәле; **двузна́чное сло́во** ике мәғәнәле һүҙ

**ДВУКО́ЛКА** *ж* ҡуян арба, ике тәгәрмәсле арба

**ДВУКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое икеләтә, ике ҡат (тапҡыр); **двукра́тный чемпио́н** ике тапҡыр чемпион; **взыска́ть штраф в двукра́тном разме́ре** штрафты икеләтә күләмдә түләтеү

**ДВУКРЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ике (ҡуш) ҡанатлы; **двукры́лый аэропла́н** ике ҡанатлы аэроплан; **двукры́лое насеко́мое** ҡуш ҡанатлы бөжәк **2.** *в знач. сущ.* **двукры́лые** *мн.*; *зоол.* ҡуш ҡанатлылар (*себен, серәкәй, күгәүен һ.б.*)

**ДВУЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее *бот.* ике йыллыҡ; **двуле́тние расте́ния** ике йыллыҡ үҫемлектәр (*кәбеҫтә, кишер*)

**ДВУЛИ́КИЙ,** -ая, -ое *книжн. см.* **двули́чный** ♦ **двули́кий Я́нус** ике йөҙлө кеше (*ике йөҙө ике яҡҡа ҡаратып эшләнгән Боронғо Рим аллаһы Янус һүрәтенән*)

**ДВУЛИ́ЧИЕ** *с* и **ДВУЛИ́ЧНОСТЬ** *ж* ике йөҙлөлөк, монафиҡлыҡ

**ДВУЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ике йөҙлө, монафиҡ; **быть двули́чным** ике йөҙлө булыу

**ДВУНО́ГИЙ,** -ая, -ое ике аяҡлы

**ДВУО́КИСЬ** *ж*; *хим.* двуокись (*икеләтә әсемә*); **двуо́кись азо́та** азоттың двуокисы

**ДВУПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое ике бармаҡлы

**ДВУПЛА́ННЫЙ,** -ая, -ое ике планда урынлашҡан, ике планда күрһәтелә торған; **двупла́нное изображе́ние** ике планда күрһәтелә торған һүрәт

**ДВУПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *биол.* ике енесле, ҡыҙтәкә, хөнәсә **2.** *бот.* ике енесле (*аталыҡ һәм инәлек сәскәләре бергә булған үҫемлек*)

**ДВУПО́ЛЬЕ** *с*; *с.-х.* ике баҫыулы сәсеү әйләнеше

**ДВУПО́ЛЬНЫЙ** и **ДВУХПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* ике баҫыулы; **двупо́льный севооборо́т** ике баҫыулы сәсеү әйләнеше

**ДВУРУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ике тотҡалы; **двуру́чная пила́** ике тотҡалы бысҡы, арҡыры бысҡы

**ДВУРУ́ШНИК** *м* ике йөҙлө кеше

**ДВУРУ́ШНИЧАТЬ** *несов.* ике йөҙләнеү, иблисләнеү

**ДВУРУ́ШНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ике йөҙлө

**ДВУРУ́ШНИЧЕСТВО** *с* ике йөҙлөлөк

**ДВУСКА́ТНЫЙ** и **ДВУХСКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое ике яҡлы, ике яҡлап ябылған; **двуска́тная кры́ша** ике яҡлы ҡыйыҡ

**ДВУСЛО́ЖНЫЙ** и **ДВУХСЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* ике ижекле; **двусло́жное сло́во** ике ижекле һүҙ

**ДВУСМЫ́СЛЕННОСТЬ** *ж* ике мәғәнәлелек (төрлөлөк), икеле булыу; **двусмы́сленность сужде́ния** фекерҙең ике төрлөлөгө

**ДВУСМЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое ике мәғәнәле; **двусмы́сленный отве́т** ике мәғәнәле яуап

**ДВУСМЫ́СЛИЦА** *ж* ике (төрлө) мәғәнәлелек

**ДВУСПА́ЛЬНЫЙ** и **ДВУХСПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ике кешелек, ике кеше йоҡлай торған; **двуспа́льная крова́ть** ике кешелек карауат

**ДВУСТВО́ЛКА** и **ДВУХСТВО́ЛКА** *ж* ҡушкөбәк, ҡушкөбәкле мылтыҡ

**ДВУСТВО́ЛЬНЫЙ** и **ДВУХСТВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡушкөбәкле, ике көбәкле

**ДВУСТВО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое ҡуш ҡапҡаслы, ике (йәпле) ҡапҡаслы, ике яҡҡа асмалы; **двуство́рчатая дверь** ике яҡҡа асмалы ишек; **двуство́рчатое окно́** ике яҡҡа асмалы тәҙрә

**ДВУСТИ́ШИЕ** *с*; *лит.* (*стихотворение*) ике юллыҡ шиғыр; (*строфа*) шиғырҙың ике юллыҡ өлөшө

**ДВУСТОРО́ННИЙ** и **ДВУХСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** ике яҡлы; **двусторо́ннее движе́ние** ике яҡлы хәрәкәт; **двусторо́нний драп** ике яҡлы драп **2.** ике яҡлы, һәр ике яҡ өсөн мәжбүри; **двусторо́ннее соглаше́ние** ике яҡлы килешеү; **двусторо́нние конта́кты** ике яҡлы бәйләнештәр

**ДВУХ...** *см.* **дву...**

**ДВУХВО́СТКИ** *мн.*; *зоол.* айырығойроҡ, асалы ҡойроҡ

**ДВУХГОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ике йыллыҡ; **двухгоди́чный курс** ике йыллыҡ курс

**ДВУХГОДОВА́ЛЫЙ,** -ая, -ое ике йәшлек; **двухгодова́лый ребёнок** ике йәшлек бала; **двухгодова́лая овца́** тешәү (шешәк) һарыҡ

**ДВУХДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое ике көнлөк; **двухдне́вный перехо́д** ике көнлөк юл; **в двухдне́вный срок** ике көн эсендә

**ДВУХДОРО́ЖЕЧНЫЙ,** -ая, -ое ике юллы, ике һыҙыҡлы

**ДВУХКВАРТИ́РНЫЙ,** -ая, -ое ике фатирлы; **двухкварти́рный дом** ике фатирлы йорт

**ДВУХКО́МНАТНЫЙ,** -ая, -ое ике бүлмәле; **двухко́мнатная кварти́ра** ике бүлмәле фатир

**ДВУХКОЛЁСНЫЙ,** -ая, -ое ике тәгәрмәсле; **двухколёсный тра́ктор** ике тәгәрмәсле трактор

**ДВУХЛЕ́ТИЕ** *с* ике йыл (йыллыҡ); **двухле́тие совме́стной жи́зни** бергә тороуҙың ике йыллығы

**ДВУХЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) ике йыллыҡ **2.** (*о возрасте*) ике (йәштәге) йәшлек (*бала*); шешәк, тешәү (*мал*); **двухле́тний гусь** шешәк ҡаҙ; **двухле́тняя коза́ (овца́)** тешәү кәзә (һарыҡ)

**ДВУХМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое ике урынлы, ике кешелек; **двухме́стный но́мер** ике урынлы номер (*ҡунаҡханала*)

**ДВУХМЕ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое ике айлыҡ; **двухме́сячный ребёнок** ике айлыҡ бала

**ДВУХМОТО́РНЫЙ,** -ая, -ое ике моторлы; **двухмото́рная ло́дка** ике моторлы кәмә

**ДВУХНЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ике аҙналыҡ; **двухнеде́льный о́тпуск** ике аҙналыҡ ял **2.** (*о периодике*) ике аҙнаға бер сыға торған, ике аҙналыҡ; **двухнеде́льный журна́л** ике аҙнаға бер сыға торған журнал

**ДВУХПАЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое ике палаталы; **двухпала́тный парла́мент** ике палаталы парламент

**ДВУХПАРТИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ике фирҡәле; **двухпарти́йная систе́ма** ике фирҡәле система

**ДВУХПРОГРА́ММНЫЙ,** -ая, -ое ике программалы; **двухпрогра́ммное радиовеща́ние** ике программалы радиотапшырыу

**ДВУХРА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое ике тапҡыр, ике тапҡыр эшләнә торған; **двухра́зовое пита́ние** ике тапҡыр туҡланыу (режимы)

**ДВУХРЯ́ДКА** *ж*; *разг.* ике рәт клавишлы (телле) гармун

**ДВУХРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ике рәтле; **двухря́дная гармо́нь** *см.* **двухря́дка**

**ДВУХСВЕ́ТНЫЙ** и **ДВУСВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ике ҡат тәҙрәле, аҫлы-өҫлө тәҙрәле; **двухсве́тный зал** аҫлы-өҫлө тәҙрәле зал

**ДВУХСОТЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) ике йөҙ йыл **2.** (*годовщина*) ике йөҙ йыллыҡ; **двухсотле́тие го́рода** ҡаланың ике йөҙ йыллығы

**ДВУХСО́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ике йөҙөнсө; **двухсо́тый киломе́тр** ике йөҙөнсө километр

**ДВУХТА́КТНЫЙ,** -ая, -ое *тех.*, *муз.* ике тактлы; **двухта́ктный мото́р** ике тактлы мотор; **двухта́ктная па́уза** ике тактлы пауза

**ДВУХТО́МНИК** *м*; *разг.* ике томлыҡ; **двухто́мник сочине́ний Пу́шкина** Пушкиндың ике томлыҡ әҫәрҙәре

**ДВУХТО́МНЫЙ,** -ая, -ое ике томлы; **двухто́мная энциклопе́дия** ике томлы энциклопедия

**ДВУХТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое *числ.* **1.** ике меңенсе; **двухты́сячный год** ике меңенсе йыл **2.** ике меңдән торған; **двухты́сячный отря́д** ике мең кешелек отряд **3.** *разг.* (*стоимость*) ике меңлек; **двухты́сячный ковёр** ике меңлек келәм

**ДВУХФА́ЗОВЫЙ** и **ДВУХФА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *эл.* ике фазалы

**ДВУХЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ике төҫлө (*буяулы*), ике төҫтән торған

**ДВУХЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** ике сәғәтлек; **двухчасово́е выступле́ние** ике сәғәтлек сығыш **2.** икелә, сәғәт икелә килә (китә) торған; **двухчасово́й по́езд** сәғәт икелә килә торған поезд

**ДВУХЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ике ҡатлы, аҫлы-өҫлө; **двухэта́жный дом** ике ҡатлы йорт

**ДВУЧЛЕ́Н** *м*; *мат.* ике быуын, бином

**ДВУЯЗЫ́ЧИЕ** *с* **1.** ике теллелек; **распростране́ние двуязы́чия** ике теллелектең киң таралыуы **2.** ике телле булыу, ике телде белеү, ике теллелек

**ДВУЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ике телле, ике телде белгән; **двуязы́чное населе́ние** ике телде белгән халыҡ **2.** ике телле, ике телдә төҙөлгән; **двуязы́чный слова́рь** ике телле һүҙлек

**ДЕБАРКА́ДЕР** и **ДЕБАРКАДЕ́Р** *м*; *уст.* дебаркадер (*тимер юл станцияһындағы платформа йәки пароход пристанендә юлсыларҙы ултыртыу урыны*)

**ДЕБАТИ́РОВАТЬ** *несов. что* и *без доп.* бәхәс алып барыу, фекер алышыу, тикшереү; **дебати́ровать вопро́с** мәсьәлә буйынса фекер алышыу

**ДЕБА́ТЫ** *только мн.* фекер алышыуҙар, бәхәстәр; **горя́чие деба́ты** ҡыҙыу бәхәстәр

**ДЕБЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое йыуан, һимеҙ, таҙа; **дебе́лая же́нщина** йыуан (таҙа) ҡатын

**ДЕ́БЕТ** *м*; *бухг.* дебет (*керем-сығым кенәгәһендә керем, аласаҡ һәм бурыстар яҙыла торған бүлек*)

**ДЕБИ́Т** *м*; *спец.* дебит (*билдәле бер ваҡыт эсендә сығанаҡтан килә торған газ, нефть, һыу һ.б. миҡдары*)

**ДЕБИТО́Р** *м*; *бухг.* дебитор (*бурыслы кеше йәки учреждение*)

**ДЕБО́Ш** *м* янъял, ғауға, талаш-һуғыш; **устро́ить дебо́ш** янъял сығарыу

**ДЕБОШИ́Р** *м* янъялсы, ғауға (тауыш) ҡуптарыусы

**ДЕБОШИ́РИТЬ** *несов.* янъял сығарыу, ғауға (тауыш) ҡуптарыу

**ДЕБОШИ́РСТВО** *с* янъял сығарыу, ғауға (тауыш) ҡуптарыу

**ДЕ́БРИ** *только мн.* **1.** (*непроходимый лес*) шырлыҡ **2.** (*глухое место*) төпкөл, ҡараңғы урын **3.** *чего*, *какие*; *перен.* төпкөлдәр, буталсыҡтар, башватҡыс; **де́бри матема́тики** математиканың буталсыҡтары

**ДЕБЮ́Т** *м* дебют (**1.** *артистың беренсе рәсми сығышы йәки яҙыусының беренсе әҫәрен сығарыуы* **2.** *шахмат йәки шашка уйынында: беренсе йөрөү, йөрөй башлау, уйын башлау*)

**ДЕБЮТА́НТ** *м* и **ДЕБЮТА́НТКА** *ж* дебютант (*тәү башлап сығыш яһаусы, мәҫ., сәхнәлә, кинола, спортта*)

**ДЕБЮТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* тәү башлап сығыш яһау

**ДЕ́ВА** *ж* **1.** *трад.-поэт.* ҡыҙ **2.** *астр.* Ҡыҙ (*йондоҙлоҡ*) ♦ **ста́рая де́ва** ултырған ҡыҙ, кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ

**ДЕВАЛЬВА́ЦИЯ** *ж* **1.** девальвация (*бәһәһы төшкән аҡсаны әйләнештән алып һәм тоторoҡло кредит билеттарына алмаштырыу йәки ҡулланыуҙағы аҡсаның рәсми курсын төшөрөү юлы менән үткәрелә торған аҡса реформаһы*) **2.** *чего*; *перен.* бәһәһын юғалтыу, ҡиммәтен төшөрөү, осһоҙландырыу; **девальва́ция дипло́мов** дипломдарҙың бәһәһын төшөрөү

**ДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **деть**

**ДЕВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **де́ться**

**ДЕ́ВЕРЬ** *м* **1.** (*старший брат мужа*) ҡайнаға **2.** (*младший брат мужа*) ҡәйнеш

**ДЕВИА́ЦИЯ** *м*; *спец.* девиация (*компас уғының, бик ҙур тимер массаһы йоғонтоһо арҡаһында, меридиан һыҙығынан тайпылыуы*)

**ДЕВИ́З** *м* девиз (**1.** *үҙеңде тотоуҙа, эштә төп идеяны, маҡсатты сағылдырған өндәмә* **2.** *конкурсҡа ебәрелгән әҫәрҙәрҙә авторҙың исем, фамилияһын алмаштырған йәшерен билдә-һүҙ* **3.** *гербтарға яҙылған оран, саҡырыу һүҙе*)

**ДЕ́ВИЦА** и *трад.-поэт.* **ДЕВИ́ЦА** *ж*; *уст. см.* **де́вушка** ♦ **кра́сная де́вица**: 1) (*о красивой молодой девушке*) йәш һылыу ҡыҙ (һылыуҡай) 2) (*о робком, скромном, застенчивом молодом человеке*) ҡыҙҙар кеүек (һымаҡ), ҡыҙыҡай (*баҫалҡы, оялсан егет тураһында*)

**ДЕВИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **де́вичий**

**ДЕВИ́ЧЕСТВО** *с* ҡыҙ ваҡыт (саҡ)

**ДЕ́ВИЧИЙ** и **ДЕВИ́ЧИЙ,** -ья, -ье ҡыҙ ...ы, ҡыҙҙар ...ы; **де́вичья красота́** ҡыҙ(ҙар) һылыулығы ♦ **деви́чья па́мять** *шутл.* ҡыҙҙар хәтере (*тиҙ онотоусан кеше тураһында*)

**ДЕВИ́ЧНИК** *м* **1.** ҡыҙҙы оҙатыу кисәһе (*урыҫ халыҡ туй йолаһы буйынса ҡыҙҙың әхирәттәре менән туй алдынан үткәрелгән хушлашыу кисәһе*) **2.** ҡыҙҙар аулағы

**ДЕ́ВИЧЬЯ** *ж*; *уст.* ҡыҙҙар бүлмәһе (*байҙар йортонда хеҙмәтсе ҡыҙҙар йәшәй торған бүлмә*)

**ДЕВО́Н** *м*; *геол.* девон (*ер тарихында палеозой эраһының өсөнсө дәүере*)

**ДЕВО́НСКИЙ,** -ая, -ое *геол.* девон ...ы; **дево́нская нефть** девон нефте; **дево́нские отложе́ния** девон ятҡылыҡтары

**ДЕ́ВОЧКА** *ж* ҡыҙ, ҡыҙ бала, ҡыҙыҡай

**ДЕ́ВСТВЕННИК** *м* ғиффәтле (саф) егет; **де́вственница** *ж* ғиффәтле (саф) ҡыҙ

**ДЕ́ВСТВЕННОСТЬ** *ж* **1.** ғиффәтлелек, сафлыҡ; **де́вственность по́мыслов** уйҙарҙың сафлығы **2.** кеше ҡулы теймәгәнлек, кеше аяғы баҫмағанлыҡ; **де́вственность приро́ды** тәбиғәттең кеше аяғы баҫмағанлығы

**ДЕ́ВСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*целомудренный*) ғиффәтле, саф; **де́вственный ю́ноша** ғиффәтле (йәш) егет **2.** *перен.* тәбиғи хәлендә, кеше (ҡулы-аяғы) теймәгән, баҫмаған; **де́вственный лес** кеше аяғы баҫмаған, кеше ҡулы теймәгән урман ♦ **де́вственная плева́** *анат.* ҡыҙлыҡ пәрҙәһе

**ДЕ́ВУШКА** *ж* **1.** ҡыҙ, еткән ҡыҙ; **краси́вая де́вушка** матур ҡыҙ **2.** (*форма обращения к молодым женщинам*) туташ

**ДЕВЧА́ЧИЙ,** -ья, -ье *разг.* ҡыҙҙар ...ы; **девча́чьи мане́ры** ҡыҙҙар ҡыланышы

**ДЕВЧО́НКА** *ж*; *разг.*, *уничиж.* ҡыҙыҡай, ҡыҙ остоғо

**ДЕВЧО́НОЧИЙ,** -ья, -ье *разг. см.* **девча́чий**

**ДЕВЯНО́СТО** *числ.* туҡһан; **девяно́сто лет** туҡһан йәш

**ДЕВЯНОСТОЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) туҡһан йыл **2.** (*годовщина*) туҡһан йыллыҡ

**ДЕВЯНОСТОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) туҡһан йыллыҡ ...ы; **девяностоле́тний юбиле́й** туҡһан йыллыҡ юбилей **2.** (*о возрасте*) туҡһан йәшлек

**ДЕВЯНО́СТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* туҡһанынсы; **девяно́стые го́ды** туҡһанынсы йылдар

**ДЕВЯСИ́Л** *м* андыҙ (*дарыу үләне*)

**ДЕ́ВЯТЕРО** *числ. собир.* туғыҙ; **де́вятеро сынове́й** туғыҙ ул (малай)

**ДЕВЯТИКЛА́ССНИК** *м* и **ДЕВЯТИКЛА́ССНИЦА** *ж* туғыҙынсы синыф уҡыусыһы, туғыҙынсы синыфта уҡыусы

**ДЕВЯТИТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое *числ.* туғыҙ меңенсе

**ДЕВЯТИЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*продолжающийся девять часов*) туғыҙ сәғәтлек; **девятичасова́я програ́мма** туғыҙ сәғәтлек программа **2.** сәғәт туғыҙҙа килә (китә) торған; **девятичасово́й по́езд** сәғәт туғыҙҙа килә торған поезд

**ДЕВЯ́ТКА** *ж* **1.** (*цифра*) туғыҙлыҡ, туғыҙлы һан **2.** *карт.* туғыҙлы кәрт **3.** *разг.* туғыҙынсы, туғыҙынсы номер (*трамвай, троллейбус һ.б.*)

**ДЕВЯТНА́ДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун туғыҙынсы

**ДЕВЯТНА́ДЦАТЬ** *числ.* ун туғыҙ; **девятна́дцать рубле́й** ун туғыҙ һум

**ДЕВЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* туғыҙынсы; **девя́тый час** сәғәт туғыҙынсы

**ДЕ́ВЯТЬ** *числ.* туғыҙ; **де́вять челове́к** туғыҙ кеше

**ДЕВЯТЬСО́Т** *числ.* туғыҙ йөҙ; **девятьсо́т киломе́тров** туғыҙ йөҙ километр

**ДЕ́ВЯТЬЮ** *нареч.* туғыҙың, туғыҙ ерҙә; **де́вятью де́вять — во́семьдесят оди́н** туғыҙ туғыҙың һикһән бер

**ДЕГАЗА́ТОР** *м* дегазатор (**1.** *дегазация яһау аппараты* **2.** *дегазация яһаусы*)

**ДЕГАЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дегазация ...ы; **дегазацио́нный прибо́р** дегазация приборы

**ДЕГАЗА́ЦИЯ** *ж* дегазация (*ағыуланған урынды, нәмәләрҙе зарарһыҙландырыу, ағыуҙан таҙартыу*); **проводи́ть дегаза́цию** дегазация үткәреү

**ДЕГАЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* ағыуһыҙландырыу, дегазациялау; **дегази́ровать зда́ние** бинаны дегазациялау

**ДЕГЕНЕРА́Т** *м* дегенерат (*физик йәки психик яҡтан зәғиф кеше*)

**ДЕГЕНЕРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое дегенератив, зәғиф, бөтөүгә юл тотҡан; **дегенерати́вные измене́ния** дегенератив үҙгәрештәр

**ДЕГЕНЕРА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* дегенерация (*организмда биологик һәм психик билдәләрҙең зәғифләнә барыуы, тоҡом боҙолоуы*)

**ДЁГОТЬ** *м* дегет; **древе́сный дёготь** ағас дегете; **смоляно́й дёготь** сайыр дегете; **гнать дёготь** дегет ҡыуыу ♦ **ло́жка дёгтя в бо́чке мёда** бер ҡалаҡ дегет бер мискә балды боҙор

**ДЕГРАДА́ЦИЯ** *ж* деградация (*артҡа китеү, үҫеш кимәле түбәнәйә барыу*)

**ДЕГРАДИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* деградацияға бирелеү

**ДЕГТЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дегет ...ы; **дегтя́рный за́пах** дегет еҫе **2.** дегетле, дегет ҡушылған; **дегтя́рное мы́ло** дегетле һабын

**ДЕГТЯ́РНЯ** *ж* дегет баҙы (*дегет ҡайнатыу урыны*)

**ДЕГУСТА́ТОР** *м* дегустатор (*аҙыҡтың, эсемлектәрҙең тәмен татып, уларҙың сифатын билдәләүсе кеше*)

**ДЕГУСТА́ЦИЯ** *ж* дегустация

**ДЕГУСТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* дегустация яһау (*дегустация үткәреү*)

**ДЕД** *м* **1.** (*отец отца или матери*) олатай; (*отец отца*) ҡартатай **2.** *разг.* (*старик — при обращении*) бабай, ҡарт ♦ **де́ды и пра́деды** ата-бабалар, атай-олатайҙар

**ДЕДЕРО́Н** *м* дедерон (*синтетик туҡыма*); **чулки́ из дедеро́на** дедерон ойоҡ

**ДЕД МОРО́З** *м* Ҡыш бабай; **пода́рок Де́да Моро́за** Ҡыш бабай бүләге

**ДЕДУ́КЦИЯ** *ж*; *лог.* дедукция (*дөйөмдән конкретҡа күсеп фекер йөрөтөү ысулы*)

**ДЕ́ДУШКА** *м* **1.** *см.* **дед** 1; **2.** (*форма обращения*) олатай, бабай

**ДЕЕПРИЧА́СТИЕ** *с*; *грам.* хәл ҡылым; **обособле́ние дееприча́стий** хәл ҡылымдарҙың айырымланыуы

**ДЕЕПРИЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* хәл ҡылым ...ы; **дееприча́стный оборо́т** хәл ҡылым әйтеме

**ДЕЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* **1.** *книжн.* эшкә яраҡлылыҡ (сапсанлыҡ), һәләтлелек **2.** *юр.* юридик хоҡуҡлылыҡ, хоҡуҡҡа һәләтлелек

**ДЕЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* эшкә яраҡлы, һәләтле; **дееспосо́бный органи́зм** эшкә яраҡлы организм **2.** *юр.* юридик хоҡуҡлы, хоҡуҡҡа һәләтле; **дееспосо́бный граждани́н** юридик хоҡуҡлы гражданин

**ДЕЖУ́РИТЬ** *несов.* дежур (итеү) булыу, дежурҙа тороу

**ДЕЖУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дежур, дежур итеүсе, дежурҙа тороусы; **дежу́рный врач** дежур врач **2.** *в знач. сущ.* **дежу́рный** *м* и **дежу́рная** *ж* дежур, нәүбәтсе ♦ **дежу́рное блю́до** әҙер аш (*ресторанда, ашханала һәр саҡ ҡулланыла торған әҙер аш*); **дежу́рный магази́н** дежур магазин

**ДЕЖУ́РСТВО** *с* дежурлыҡ, дежур эше, нәүбәт; **установи́ть дежу́рство** дежурлыҡ индереү, нәүбәт булдырыу

**ДЕЗАВУИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что*; *офиц.-дел.* риза (булмауҙы) түгеллекте белдереү (иғлан итеү), хоҡуғын юҡҡа сығарыу; **дезавуи́ровать своего́ представи́теля** үҙ вәкиленДең эшмәкәрлегенән риза булмауҙы белдереү

**ДЕЗЕРТИ́Р** *м* дезертир, ҡасҡын; **лови́ть дезерти́ров** дезертирҙарҙы тотоу

**ДЕЗЕРТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* дезертирлыҡ итеү, ҡасып йөрөү; **дезерти́ровать со слу́жбы** хеҙмәттән ҡасып йөрөү

**ДЕЗЕРТИ́РСТВО** *с* дезертирлыҡ, ҡасҡынлыҡ

**ДЕЗИНСЕ́КЦИЯ** *ж* дезинсекция (*зарарлы бөжәктәрҙе ағыулап ҡырыу*)

**ДЕЗИНФЕКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дезинфекция ...ы; **дезинфекцио́нная ка́мера** дезинфекция камераһы

**ДЕЗИНФЕ́КЦИЯ** *ж* дезинфекция, йоғошһоҙлау; **произвести́ дезинфе́кцию** дезинфекция үткәреү

**ДЕЗИНФИЦИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* дезинфекциялау, дезинфекция яһау, йоғошһоҙландырыу; **дезинфици́ровать оде́жду** кейемде дезинфекциялау, кейемгә дезинфекция яһау

**ДЕЗИНФОРМА́ЦИЯ** *ж* ялған хәбәр (мәғлүмәт, информация); **дезинформа́ция обще́ственности** йәмәғәтселеккә ялған хәбәр таратыу

**ДЕЗИНФОРМИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* яңылыш информация (ялған мәғлүмәт) биреү

**ДЕЗОРГАНИЗА́ТОР** *м* дезорганизатор, тарҡатыусы, тарҡаулыҡ (тәртипһеҙлек) индереүсе

**ДЕЗОРГАНИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое тарҡатыу ...ы; **дезорганиза́торские де́йствия** тарҡатыу эштәре

**ДЕЗОРГАНИЗА́ЦИЯ** *ж* тарҡаулыҡ, тәртипһеҙлек; **вноси́ть дезорганиза́цию в рабо́ту** эшкә тарҡаулыҡ индереү

**ДЕЗОРГАНИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* тарҡатыу, тарҡаулыҡ (тәртипһеҙлек) индереү

**ДЕЗОРИЕНТА́ЦИЯ** *ж* яңылыш юлға йүнәлтеү, яңылыш фекер тыуҙырыу, яңылыштырыу, юл яҙлыҡтырыу

**ДЕЗОРИЕНТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* яңылыш фекер тыуҙырыу

**ДЕИ́ЗМ** *м*; *филос.* деизм (*алланың ғаләмде барлыҡҡа килтереүен, ләкин тәбиғәткә һәм йәмғиәт тормошона йоғонто яһай алмауын раҫлаусы дини-фәлсәфәүи тәғлимәт*)

**ДЕ́ЙСТВЕННОСТЬ** *ж* тәьҫир итеүсәнлек, йоғонто яһау көсө, тәьҫирлек; **де́йственность кри́тики** тәнҡиттең тәьҫирлеге

**ДЕ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое тәьҫирле, тәьҫир итерлек, йоғонтоло, көслө; **де́йственное сре́дство** тәьҫирле (көслө) сара

**ДЕ́ЙСТВИЕ** *с* **1.** (*деятельность, работа*) эш, эш итеү, эшмәкәрлек; **план де́йствий** эш пландары; **привести́ маши́ну в де́йствие** машинаны эшләтеп ебәреү **2.** *юр.* көс; **догово́р сохраня́ет своё де́йствие** килешеү үҙ көсөн һаҡлай **3.** (*влияние, воздействие*) тәьҫир, йоғонто; **под де́йствием со́лнца** ҡояш тәьҫире аҫтында **4.** *обычно мн.* **де́йствия** (*поступки*) эш, эш итеү(ҙәр); **незако́нные де́йствия** законһыҙ эш итеүҙәр **5.** (*события*) ваҡиға, хәл; **де́йствие произошло́ в го́роде** ваҡиға ҡалала булған **6.** *театр.* (*часть драматического произведения*) күренеш, шаршау; **пье́са в двух де́йствиях** ике шаршаулы пьеса **7.** *мат.* ғәмәл; **четы́ре де́йствия арифме́тики** арифметиканың дүрт ғәмәле ♦ **вое́нные де́йствия** һуғыш хәрәкәттәре

**ДЕЙСТВИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* **1.** ысынлап, ысындан да, дөрөҫөндә; **он действи́тельно заболе́л** ул ысындан да ауырып киткән **2.** *в знач. вводн. сл.* ысынлап та; **действи́тельно, у него́ дела́ в поря́дке** ысынлап та, уның эштәре һәйбәт

**ДЕЙСТВИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** (*реальность*) ысынбарлыҡ; **совреме́нная действи́тельность** хәҙерге ысынбарлыҡ **2.** (*подлинность*) ысынлыҡ, дөрөҫлөк; **действи́тельность докуме́нта** документтың ысынлығы ♦ **в действи́тельности** ысынында, дөрөҫөндә, дөрөҫөн әйткәндә

**ДЕЙСТВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ысын, дөрөҫ, реаль, булған, хаҡ; **действи́тельный факт** булған факт; **действи́тельная жизнь** ысын (реаль) тормош **2.** көскә эйә, үҙ көсөндә, яраҡлы; **удостовере́ние действи́тельно в тече́ние ме́сяца** танытма бер ай көскә эйә ♦ **действи́тельная (вое́нная) слу́жба** мәжбүри ғәскәри хеҙмәт; **действи́тельное число́** *мат.* ысын һан; **действи́тельный зало́г** *грам.* төп йүнәлеш; **действи́тельный член Акаде́мии нау́к РБ** БР фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы

**ДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** эш итеү, эшләү; **де́йствовать по зако́ну** ҡанун буйынса эш итеү; **отря́д де́йствует но́чью** отряд төнөн эш итә **2.** эшләү, йөрөү; **телефо́н не де́йствует** телефон эшләмәй **3.** *на кого-что* тәьҫир итеү, йоғонто яһау; **лека́рство на́чало де́йствовать** дарыу тәьҫир итә башланы **4.** *чем*; *разг.* эш (хәрәкәт) итеү, ҡуҙғатыу, эшләтеү; **де́йствовать одно́й руко́й** бер ҡул менән эш итеү **5.** көсөндә (ғәмәлдә) булыу; **зако́н де́йствует со дня его́ опубликова́ния** ҡанун баҫылып сыҡҡан көнөнән көсөнә инә ♦ **де́йствовать на не́рвы** кешенең йәнен үртәү, нервыһына тейеү

**ДЕ́ЙСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **де́йствовать** **2.** *прил.* (*о законах, постановлениях*) ғәмәлдәге (көсөндә) булған; **де́йствующий ука́з** ғәмәлдәге указ ♦ **де́йствующая а́рмия** хәрәкәт итеүсе (һуғыштағы) армия; **де́йствующие ли́ца** ҡатнашыусылар (*пьесала*)

**ДЕК** *м*; *мор.* дек (*судноның ябыҡ палубаһы*)

**ДЕ́КА** *ж*; *муз.* дека (*ҡыллы музыка ҡоралының тауышын көсәйтә торған аҫҡы һәм өҫкө планкалары*)

**ДЕКАБРИ́СТ** *м*; *ист.* декабрист (*Рәсәйҙә 1825 й. декабрь ихтилалында ҡатнашыусы*)

**ДЕКАБРИ́СТКА** *ж*; *ист.* декабристың ҡатыны

**ДЕКА́БРЬ** *м* декабрь, декабрь айы

**ДЕКА́БРЬСКИЙ,** -ая, -ое декабрь ...ы; **дека́брьские моро́зы** декабрь һыуыҡтары

**ДЕКА́ДА** *ж* **1.** ун көн, ун көнлөк; **пе́рвая дека́да января́** ғинуарҙың беренсе ун көнлөгө **2.** декада (*әҙәбиәткә, сәнғәткә һ.б. бағышланған ун көнлөк*); **Дека́да башки́рского иску́сства** Башҡорт сәнғәте декадаһы

**ДЕКАДЕ́НТ** *м* декадент

**ДЕКАДЕ́НТСКИЙ,** -ая, -ое декадент, декадентлыҡ ...ы; **декаде́нтские стихи́** декадент шиғырҙар

**ДЕКАДЕ́НТСТВО** *с* декадентлыҡ (*XIX б. аҙағында һәм XX б. башында әҙәбиәттә, сәнғәттә төшөнкөлөк һәм сиктән тыш индивидуализм менән билдәләнгән йүнәлештәрҙең дөйөм атамаһы*)

**ДЕКА́ДНЫЙ,** -ая, -ое ун көнлөк эсендә

**ДЕКАЛИ́ТР** *м* декалитр (*ун литр*)

**ДЕКА́Н** *м* декан (*юғары уҡыу йортонда факультет менән етәкселек итеүсе кеше*); **дека́н истори́ческого факульте́та** тарих факультеты деканы

**ДЕКАНА́Т** *м* деканат; **распоряже́ние декана́та** деканат әмере; **зайти́ в докана́т** деканатҡа инеү

**ДЕКАТИРОВА́ТЬ** и **ДЕКАТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* декатировкалау, декатировка яһау (*туҡыманың сифатын яҡшыртыу маҡсатында пар йәки эҫе һыу менән эшкәртеү*); **декатирова́ть ткань** туҡыманы декатировкалау

**ДЕКАТИРО́ВКА** *ж см.* **декатирова́ть**

**ДЕКВАЛИФИКА́ЦИЯ** *ж* квалификацияны юғалтыу

**ДЕКВАЛИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов.* квалификацияһыҙланыу, квалификация юғалтыу

**ДЕКЛАМА́ТОР** *м* декламатор, нәфис һүҙ оҫтаһы

**ДЕКЛАМА́ЦИЯ** *ж* декламация, нәфис һүҙ оҫталығы, нәфис уҡыу сәнғәте

**ДЕКЛАМИ́РОВАТЬ** *несов. что* декламация һөйләү (уҡыу), нәфис һүҙ һөйләү, тасуири уҡыу; **деклами́ровать стихи́** шиғырҙы тасуири уҡыу

**ДЕКЛАРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* декларатив, рәсми; **деклара́тивное заявле́ние** декларатив белдереү

**ДЕКЛАРА́ЦИЯ** *ж* декларация, рәсми белдереү (**1.** *хөкүмәт, халыҡ-ара ойошмалар, фирҡәләр тарафынан эшләнгән рәсми белдереү* **2.** *кәрәкле мәғлүмәттәр яҙылған рәсми документ*); **прави́тельственная деклара́ция** хөкүмәт декларацияһы; **торго́вая деклара́ция** сауҙа декларацияһы

**ДЕКЛАРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* декларация яһау, иғлан итеү

**ДЕКЛАРИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* декларация яһалыу, рәсми белдерелеү

**ДЕКЛАССИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое синфи йөҙөн юғалтҡан

**ДЕКЛАССИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов.* синфи йөҙөн юғалтыу, үҙ синыфынан айырылыу

**ДЕКОЛЬТЕ́** *с нескл.* декольте (*ҡатын-ҡыҙ күлдәгендә муйын тирәһе асыҡ эшләнгән иҙеү*)

**ДЕКОРАТИ́ВНО-ПРИКЛАДНО́Й,** -ая, -ое биҙәү-ғәмәли, биҙәү-ҡулланма ...ы; **декорати́вно-прикладно́е иску́сство** биҙәү-ғәмәли сәнғәт

**ДЕКОРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** декоратив, биҙәү ...ы; **декорати́вная жи́вопись** биҙәү сәнғәте; **декорати́вное расте́ние** декоратив үҫемлек **2.** декоратив, матур; **декорати́вный вид** матур күренеш

**ДЕКОРА́ТОР** *м* декоратор (**1.** *декорациялар яһаусы* **2.** *йорттарҙы биҙәүсе*); **худо́жник-декора́тор** рәссам-декоратор

**ДЕКОРА́ЦИЯ** *ж*; *театр.* **1.** декорация (*сәхнәгә ҡуйылған әҫәргә ярашлы биҙәү йыһазы*) **2.** *перен.* тышҡы биҙәк, күҙ буяу

**ДЕКОРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* биҙәү, матурлау; **декори́ровать фаса́д зда́ния** бинаның алғы яғын (фасадын) биҙәү

**ДЕКО́РУМ** *м*; *книжн.* декорум, тышҡы нәзәкәт

**ДЕКРЕ́Т** *м* декрет (*юғары властың ҡарары*); **Декре́т о земле́** Ер тураһында декрет

**ДЕКРЕТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* декретлаштырыу, декрет сығарыу

**ДЕКРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое декрет ♦ **декре́тный о́тпуск** декрет отпускыһы (*бала тапҡан ваҡытта бирелә*)

**ДЕКСТРИ́Н** *м*; *хим.* декстрин, крахмал елеме

**ДЕ́ЛАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **де́лать** **2.** *прил.* яһалма, тәбиғи булмаған; **де́ланный смех** яһалма көлөү

**ДЕ́ЛАТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* эшләү, ҡылыу; **ничего́ не де́лать** бер ни ҙә эшләмәү; **де́лать по-сво́ему** үҙеңсә эшләү; **де́лать добро́** изгелек эшләү **2.** *что* яһау, эшләү; **де́лать стол** өҫтәл яһау **3.** *что* башҡарыу, яһау, ҡарау; **де́лать уро́ки** дәрес ҡарау; **де́лать о́быск** тентеү яһау **4.** *что* барыу, йөрөү, үтеү; **де́лать два зае́зда в день** көнөнә ике барып әйләнеү **5.** *что* тектереү, эшләтеү; **де́лать пальто́ в ателье́** ательела пальто тектереү **6.** *кого-что* итеү; **де́лать счастли́вым** бәхетле итеү; **де́лать пода́рок** бүләк итеү ♦ **де́лать акце́нт** *на чём* баҫым яһап әйтеү, һыҙыҡ өҫтөнә алыу; **де́лать больши́е (кру́глые) глаза́** күҙҙе шарҙай итеү; **де́лать вид** күрмәмешкә (белмәмешкә) һалышыу; **де́лать вы́бор** һайлау, һайлап алыу; **де́лать гла́зки** *кому* күҙ уйнатыу; **де́лать из му́хи слона́** *перен.* төймәләйҙе дөйәләй итеү; **де́лать ки́слую ми́ну (лицо́)** йөҙгә ризаһыҙлыҡ билдәһе сығарыу, сырай һытыу; **де́лать не́чего** *в знач. вводн. сл.* бер нәмә лә эшләп (ҡылып) булмай; **де́лать траге́дию** *из чего* бәләкәй генә бәләне шаштырып (ҙурға) ебәреү; **де́лать упо́р** *на кого-что, на ком-чём* баҫым яһау; **де́лать честь**: 1) ихтирам (хөрмәт) күрһәтеү; 2) ихтирамға (хөрмәткә) лайыҡ булыу; **от не́чего де́лать** эш юҡтан, буш (тик) торғандан

**ДЕ́ЛАТЬСЯ** *несов.* **1.** *кем-чем* или *каким* (*становиться*) -лана/-ләнә барыу, -ланыу/-ләнеү; **де́лается темно́** ҡараңғылана бара; **де́латься ще́дрым** йомартланыу **2.** *разг.* барлыҡҡа килеү (килеп) сығыу, хасил булыу; **в стене́ де́лаются тре́щины** стенала ярыҡтар барлыҡҡа килә **3.** *страд. от* **де́лать** 1, 2, 4 ♦ **что ему́ (тебе́, мне) де́лается** уға (һиңә, миңә) нимә (ни) булһын

**ДЕЛЕГА́Т** *м* и **ДЕЛЕГА́ТКА** *ж* делегат; **делега́т съе́зда** съезд делегаты

**ДЕЛЕГА́ЦИЯ** *ж* делегация, делегаттар төркөмө; **делега́ция шахтёров** шахтёрҙар делегацияһы; **зарубе́жная делега́ция** сит ил делегацияһы

**ДЕЛЕГИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* делегат итеп ебәреү; **делеги́ровать на съезд** съезға делегат итеп ебәреү

**ДЕЛЁЖ** *м* и **ДЕЛЁЖКА** *ж*; *разг.* бүлеү, бүлеш, бүлешеү; **делёж добы́чи** табышты бүлешеү

**ДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **дели́ть** 1; **деле́ние на ча́сти** өлөштәргә бүлеү **2.** *мат.* бүлеү ғәмәле **3.** *биол.* бүленеш, үрсеү; **деле́ние кле́ток** күҙәнәктәр бүленеше **4.** бүлем; **деле́ния термо́метра** термометрҙың бүлемдәре

**ДЕЛЕ́Ц** *м* эшҡыуар, эшмәкәр (*кеше*); **биржевы́е дельцы́** биржа эшҡыуарҙары

**ДЕЛИКАТЕ́С** *м* деликатес (*затлы, татлы ниғмәт, һирәк булған ашамлыҡ*)

**ДЕЛИКА́ТНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* артыҡ нәзәкәтле булыу, артыҡ нескәлек күрһәтеү

**ДЕЛИКА́ТНОСТЬ** *ж* нескәлек, нәзәкәтлелек

**ДЕЛИКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** нәзәкәтле, түбәнселекле, әҙәпле; **делика́тный челове́к** нәзәкәтле кеше **2.** *разг.* (*щекотливый*) сетерекле; **делика́тный вопро́с** сетерекле мәсьәлә

**ДЕЛИ́МОЕ** *с*; *мат.* бүленеүсе

**ДЕЛИ́МОСТЬ** *ж*; *мат.* бүленеүсәнлек; **дели́мость числа́** һандың бүленеүсәнлеге

**ДЕЛИ́ТЕЛЬ** *м*; *мат.* бүлеүсе

**ДЕЛИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*разъединять на части*) бүлеү, айырыу; **дели́ть студе́нтов на гру́ппы** студенттарҙы төркөмдәргә бүлеү **2.** *что* (*между собой*) бүлеү, бүлешеү; **дели́ть дохо́д** табыш бүлешеү; **дели́ть насле́дство** мираҫ бүлешеү **3.** *что*, *с кем* бүлешеү, уртаҡлашыу; **дели́ть после́дний кусо́к** һуңғы һыныҡты бүлешеү **4.** *мат.* бүлеү; **дели́ть четы́ре на́ два** дүртте икегә бүлеү **5.** *что*; *перен.* бүлешеү, уртаҡлашыу; **дели́ть го́ре и ра́дость** ҡайғы һәм шатлыҡты уртаҡлашыу ♦ **дели́ть не́чего** бүлер (уртаҡлашыр) нәмә юҡ, бәхәсләшергә урын юҡ; **дели́ть шку́ру неуби́того медве́дя** алмаған айыуҙың тиреһен тунау, тыумаған тайҙың билен һындырыу

**ДЕЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бүленеү, айырылыу; **кле́тка постоя́нно де́лится** күҙәнәк даими бүленә **2.** айырылып (бүленеп) сығыу, башҡа сығыу; **дели́ться с отцо́м** атайҙан башҡа сығыу **3.** *чем*, *с кем* бүлешеү; **дели́ться куско́м хле́ба** икмәк һынығын бүлешеү **4.** *мат.* бүленеү, бүленә алыу; **де́сять де́лится на пять** ун бишкә бүленә **5.** *чем*, *с кем*; *перен.* уртаҡлашыу; **дели́ться о́пытом с колле́гами** хеҙмәттәштәр менән тәжрибә уртаҡлашыу; **дели́ться мы́слями** фекер уртаҡлашыу **6.** *страд. от* **дели́ть** 1

**ДЕ́ЛО** *с* **1.** (*работа*, *занятие*, *деятельность*) эш; **до́брое де́ло** изге эш; **де́ло воспита́ния молодо́го поколе́ния** йәш быуынды тәрбиәләү эше; **сиде́ть без де́ла** эшһеҙ ултырыу **2.** (*специальность*, *профессия*, *ремесло*) эш, шөғөл, кәсеп; **библиоте́чное де́ло** китапхана эше; **вое́нное де́ло** хәрби эш; **откры́ть своё де́ло** үҙ кәсебеңде асыу **3.** (*о событии*, *его приближении*) эш, хәл; **де́ло бы́ло ве́чером** был хәл кис булды; **де́ло к ста́рости** эш ҡартлыҡҡа китеп бара **4.** (*надобность*, *необходимость*) эш, йомош; **ходи́ть по де́лу** эш буйынса йөрөү; **како́е де́ло** ни йомош; **де́ло не в том** эш унда түгел **5.** (*разбирательство*) эш, дело; **уголо́вное де́ло** енәйәт эше; **рассмотре́ние де́ла отло́жено** эште ҡарау кисектерелгән **6.** (*собрание документов*) дело; **подши́ть к де́лу** делоға тегеп ҡуйыу **7.** *обычн. мн.* **дела́** (*обстоятельства*) эштәр, хәл; **как дела́?** ни хәл?, эштәр нисек? **8.** *разг.* (*то*, *что важно*) мөһим нәмә, хәл; **он де́ло говори́т** ул мөһим нәмә тураһында һөйләй **9.** *в знач. сказ.* (*в сочет. с прил.*) эш, нәмә; **э́то де́ло тёмное** был бик шөбһәле эш; **удиви́тельное де́ло жизнь** ғәжәп нәмә ул тормош ♦ **бли́же к де́лу** мәсьәләгә яҡыныраҡ киләйек (*өндәү*); **ви́данное ли э́то де́ло?** ғүмерҙә булмаған, тушға яҙмаған эш-хәл; **вот э́то де́ло** бына был шәп, быныһы яраған; **в са́мом де́ле** ысынлап та, ысындан да; **в чём де́ло?** ни булды?, эш ниҙә (нимәлә)?; **ги́блое де́ло** өмөтһеҙ эш; **говори́ть де́ло** мөһим (әһәмиәтле) нәмә әйтеү; **де́ло в шля́пе** *прост.* эш беште, эш булды; **де́ло вку́са** һәр кем үҙ белдегенсә ҡылана (фекер итә); **де́ло ста́ло за** *кем-чем* эш шунда ҡалды; **де́ло привы́чное** ғәҙәти эш; **де́ло на мази́** эш көйлө; **де́ло с концо́м**; **де́лу коне́ц** *прост.* бөттө-китте, вәссәләм, шуның менән эш тә бөттө; **де́ло слу́чая** осраҡлы хәл; **изве́стное де́ло** һәр кемгә мәғлүм, билдәле (*хәлваҡиға*); **име́ть де́ло** *с кем-чем берәйһе менән* эш итеү; **ме́жду де́лом** эш араһында; **на де́ле** ғәмәлдә; **на са́мом де́ле** ғәмәлгә (эшкә) килгәндә; **не у дел** эше юҡ, ике ҡулы эшһеҙ; **ну и дела́** бына ҡайҙа китте эштәр, бына нисегерәк булып сыҡты эштәр; **пе́рвым де́лом** иң тәүҙә, иң алда (башта); **пусти́ть (употреби́ть) в де́ло** эшкә индереү, эштә ҡулланыу, эштә файҙаланыу; **то и де́ло** әленән-әле, әйләнгән һайын, ҡабат-ҡабат; **то ли де́ло** бына был (эш) шәп, был башҡаса; **э́то де́ло деся́тое** был (эш) көтөп торор, быныһы ҡасмаҫ; **дела́ как са́жа бела́** эш мөшкөл, эштәр шәптән түгел

**ДЕЛОВИ́ТОСТЬ** *ж* эшлеклелек, эшсәнлек, булдыҡлылыҡ; **прояви́ть делови́тость** эшлеклелек күрһәтеү

**ДЕЛОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое эшлекле, эшсән, булдыҡлы, ҡонар; **делови́тый челове́к** эшлекле кеше; **делови́тый вид** эшлекле ҡиәфәт

**ДЕЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** эш ...ы; **делова́я бума́га** эш ҡағыҙы **2.** эшлекле, булдыҡлы, эш ...ы; **делово́й челове́к** эш кешеһе, эшлекле кеше **3.** *спец.* эшкә (төҙөлөшкә) яраҡлы, эшкә китә торған; **делова́я древеси́на** төҙөлөшкә яраҡлы ағас

**ДЕЛОПРОИЗВОДИ́ТЕЛЬ** *м* эш башҡарыусы (*кәнсәләрҙә*)

**ДЕЛОПРОИЗВО́ДСТВО** *с* эш башҡарыу

**ДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** эш ...ы, эшлекле, булдыҡлы; **де́льный челове́к** эш кешеһе; **де́льное предложе́ние** эшлекле тәҡдим; **де́льная мысль** эшлекле фекер **2.** мөһим, әһәмиәтле, аҡыллы, төплө **3.** *см.* **делово́й** 3

**ДЕ́ЛЬТА I** *ж*; *геогр.* дельта; **де́льта Во́лги** Волганың дельтаһы

**ДЕ́ЛЬТА II** *ж* дельта (*грек алфавитында дүртенсе хәреф*) ♦ **де́льта-лучи́** *мн.*; *физ.* дельта-нурҙар

**ДЕЛЬТАПЛА́Н** *м* дельтаплан (*моторһыҙ осҡос*)

**ДЕЛЬФИ́Н** *м* дельфин (*диңгеҙҙә йәшәүсе һөтимәр хайуан*)

**ДЕЛЬФИНА́РИЙ** *м* дельфинарий (*дельфиндар өсөн бассейн*)

**ДЕЛЯ́ГА** *м*; *прост.*, *пренебр.* эшем әйәһе, донъясыл, донъяғыуар (*үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртыусы*)

**ДЕЛЯ́НКА** *ж* диләнкә (*ҡырҡыу һәм таҙартыу өсөн билдәләнгән урман биләмәһе*)

**ДЕЛЯ́ЧЕСТВО** *с* эшем әйәһе булыу, донъя ҡыуыу

**ДЕМАГО́Г** *м* демагог (*демагогия менән шөғөлләнеүсе*)

**ДЕМАГОГИ́ЧЕСКИЙ** и **ДЕМАГОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое демагогик, демагогтарса; **демагоги́ческое выступле́ние** демагогтарса сығыш

**ДЕМАГО́ГИЯ** *ж* демагогия (**1.** *ялған һүҙ һөйләү, буш вәғәҙәләр биреп, үҙ мақсатыңа ирешергә тырышыу* **2.** *мәсьәләне тупаҫ рәүештә бер яҡлы, ғәҙәттә, үҙ файҙаһына аңлауға ҡоролған фекерҙәр йәки талаптар*)

**ДЕМАРКАЦИО́ННЫЙ: демаркацио́нная ли́ния** демаркацион һыҙыҡ (*үҙ-ара һуғышыусы ике дәүләт йәки уларҙың ғәскәрҙәре ваҡытлыса килешеүгә килгәндә, уларҙы бер-беренән айырып тора торған сик*)

**ДЕМАРКА́ЦИЯ** *ж*; *спец*. демаркация (*төҙөлгән килешеү нигеҙендә ике дәүләт территорияһы араһындағы сикте билдәләү*)

**ДЕМА́РШ** *м*; *дип*. демарш, дипломатик сығыш; **дема́рш посла́** илсенең демаршы

**ДЕМАСКИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов*. *кого-что* маскировканы алыу (ташлау); **демаски́ровать объе́кт** объекттан маскировканы алыу

**ДЕМАСКИРО́ВКА** *ж см*. **демаски́ровать**

**ДЕМИЛИТАРИЗА́ЦИЯ** *ж* демилитаризация, ҡоралһыҙландырыу; **демилитариза́ция госуда́рства** дәүләтте ҡоралһыҙландырыу

**ДЕМИЛИТАРИЗОВА́ТЬ** *сов*., *несов*. *кого-что* демилитаризациялау, ҡоралһыҙландырыу

**ДЕМИСЕЗО́ННЫЙ,** -ая, -ое яҙлы-көҙлө кейә торған, яҙғы-көҙгө; **демисезо́нное пальто́** яҙғы-көҙгө пальто

**ДЕМОБИЛИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое демобилизация ...ы; **демобилизацио́нный план** демобилизация планы

**ДЕМОБИЛИЗА́ЦИЯ** *ж* демобилизация (**1.** *ғәскәри хеҙмәттән бушатыу* **2.** *ҡораллы көстәрҙе һәм халыҡ хужалығын тыныс хәлгә күсереү*)

**ДЕМОБИЛИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **демобилизова́ть 2.** *в знач. сущ.* **демобилизо́ванный** *м* демобилизацияланған (демобилизацияланып ҡайтҡан) кеше

**ДЕМОБИЛИЗОВА́ТЬ** *сов*., *несов*. *кого-что* демобилизациялау, демобилизация яһау; **демобилизова́ть солда́т** һалдаттарҙы демобилизациялау

**ДЕМОБИЛИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов*., *несов*. демобилизацияланыу, **демобилизова́ться из а́рмии** армиянан демобилизацияланыу **2.** *несов. страд. от* **демобилизова́ть**

**ДЕМО́ГРАФ** *ж* демограф, демография белгесе

**ДЕМОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое демография ...ы, демографик; **демографи́ческие подсчёты** демографик иҫәп

**ДЕМОГРА́ФИЯ** *ж* демография (*халыҡтың составын, һанын, ундағы үҙгәреш ҡанундарын өйрәнеүсе фән*)

**ДЕМОКРА́Т** *м* демократ (**1.** *демократия яҡлы кеше* **2.** *буржуаз-демократик партия ағзаһы* **3.** *уст. демократик принциптарҙы үҙ тормошонда үткәрергә тырышыусы, ябай халыҡ араһынан сыҡҡан кеше*)

**ДЕМОКРАТИЗА́ЦИЯ** *ж* демократлаштырыу, демократлаштырылыу; **демократиза́ция обще́ственного стро́я** йәмғиәт ҡоролошон демократлаштырыу

**ДЕМОКРАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов*. *что* демократлаштырыу

**ДЕМОКРАТИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов*., *несов*. демократлашыу **2.** *несов. страд. от* **демократизи́ровать**

**ДЕМОКРАТИ́ЗМ** *м* демократизм, демократлыҡ, демократсылыҡ; **путь демократи́зма** демократизм юлы; **демократи́зм воззре́ний** ҡараштарҙағы демократлыҡ

**ДЕМОКРАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** демократик; **демократи́ческая респу́блика** демократик республика **2.** *см*. **демократи́чный** ♦ **демократи́ческий централи́зм** демократик централизм

**ДЕМОКРАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое демократик, демократтарса, ябай; **демократи́чный взгляд** демократтарса ҡараш

**ДЕМОКРА́ТИЯ** *ж* демократия (**1.** *власть халыҡ ҡулында булған, тиң хоҡуҡтар һәм ирек тәьмин ителгән сәйәси ҡоролош* **2.** *берәй коллективҡа етәкселек иткәндә уның активлығын һәм йоғонтоһон тәьмин итеү принцибы*)

**ДЕ́МОН** *м* иблис, демон

**ДЕМОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** иблистәрсә, иблис кеүек **2.** *перен*. яуыз, мәкер, уҫал; **демони́ческая нату́ра** мәкер тәбиғәтле холоҡ

**ДЕМОНСТРА́НТ** *м* и **ДЕМОНСТРА́НТКА** *ж* демонстрант, демонстрацияла ҡатнашыусы; **коло́нна демонстра́нтов** демонстранттар колоннаһы

**ДЕМОНСТРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** демонстратив, демонстратив рәүештә; **демонстрати́вный ухо́д** демонстратив рәүештә китеү **2.** күргәҙмә, күрһәтмә; **демонстрати́вный ме́тод** күргәҙмә ысул

**ДЕМОНСТРА́ТОР** *м* демонстрациялаусы, күрһәтеүсе; **демонстра́тор маши́н на вы́ставке** күргәҙмәлә машиналарҙы демонстрациялаусы (күрһәтеүсе)

**ДЕМОНСТРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое демонстрациялау ...ы, күрһәтеү ...ы; **демонстрацио́нный зал** демонстрациялау залы

**ДЕМОНСТРА́ЦИЯ** *ж* **1.** демонстрация; **идти́ на демонстра́цию** демонстрацияға барыу **2.** күрһәтеү, демонстрациялау; **демонстра́ция худо́жественного фи́льма** нәфис фильм күрһәтеү **3.** күрһәтеү, белдереү; **демонстра́ция сплочённости** берҙәмлекте күрһәтеү **4.** (*показ несогласия, протеста*) демонстрация, ҡаршы сығыш

**ДЕМОНСТРИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов*. **1.** демонстрацияла ҡатнашыу **2.** *кого-что* күрһәтеү;

**демонстри́ровать нау́чный фильм** фәнни фильм күрһәтеү **3.** (*показать несогласие*) ҡаршы сығыу

**ДЕМОНТА́Ж** *м*; *тех.* демонтаж, һүтеү, тағатыу; **демонта́ж комба́йна** комбайнды һүтеү

**ДЕМОНТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *тех.* демонтажлау, һүтеү, тағатыу, ҡутарыу; **демонти́ровать станки́** станоктарҙы һүтеү

**ДЕМОРАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* әхлаҡи тарҡалыу, тәртип бөтөү; **деморализа́ция о́бщества** йәмғиәттең әхлаҡи тарҡалыуы

**ДЕМОРАЛИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* рухи тарҡатыу, әхлаҡ боҙолоу, тәртип бөтөрөлөү

**ДЕ́МПИНГ** *м*; *эк.* демпинг (*конкуренттарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыу маҡсаты менән сит ил баҙарҙарында тауарҙарҙы үҙ хаҡынан түбән һатыу*)

**ДЕНАТУРА́Т** *м* денатурат (*техник спирт*)

**ДЕНАЦИОНАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* денационализация (**1.** *милли үҙенсәлектәрҙе юғалтыу* **2.** *национализацияланған милекте элекке хужаларына кире ҡайтарыу*)

**ДЕНАЦИОНАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* денационализациялау; **денационализи́ровать госуда́рственные предприя́тия** дәүләт предприятиеларын денационализациялау

**ДЕ́НДИ** *м нескл.* денди, ҡупшыҡай (*ҡупшы кейенгән фырт ир-егет*)

**ДЕНДРА́РИЙ** *м* дендрарий (*фәнни маҡсат менән төрлө үҫемлектәр үҫтерелә торған ботаника баҡсаһы*)

**ДЕ́НЕЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡса ...ы; **де́нежная рефо́рма** аҡса реформаһы **2.** аҡсалата, аҡсалай, аҡса ...ы; **де́нежная по́мощь** аҡсалата ярҙам **3.** *разг.* аҡсалы, аҡсаға бай; **де́нежный челове́к** аҡсалы кеше

**ДЕНЁК** *м*; *разг.*, *ласк. от* **день** 1

**ДЕННИ́К** *м*; *спец.* аран (*аҙбарҙа ат йәки һыйыр өсөн урын*)

**ДЕ́ННО: де́нно и но́щно** көнө-төнө, көнөн-төнөн, бер туҡтауһыҙ

**ДЕНОНСИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *дип.* ғәмәлдән сығыуын (сыҡҡан тип) белдереү; **денонси́ровать догово́р** килешеүҙең ғәмәлдән сығыуын белдереү

**ДЕНТИ́Н** *м* дентин (*тештең һөйәк матдәһе*)

**ДЕНЩИ́К** *м* денщик (*элекке Рәсәй армияһында офицерҙарҙың хеҙмәтсеһе*)

**ДЕНЬ** *м* **1.** *в разн. знач.* көн; **со́лнечный день** ҡояшлы көн; **в середи́не дня** көн уртаһында; **ба-за́рный день** баҙар көнө; **рабо́чий день** эш көнө; **День Побе́ды** Еңеү көнө **2.** *обычно мн.* **дни** көндәр, ваҡыт, саҡ; **в дни войны́** һуғыш ваҡытында; **дни ю́ности** йәш саҡ(тар) ♦ **день в день** көнөндә, билгеләнгән көнгә; **день-деньско́й** көн буйына, көн оҙайына; **день за́ день** көн дә бер төрлө, үҙгәрешһеҙ; **день и ночь** көн-төн, көнө-төнө; **день на́ день не прихо́дится** көнө-көнгә тап (тура) килмәй; **день ото дня** көндән-көн, әкренләп; **дни сочтены́** *чьи* көндәре һанаулы ҡалған (ғүмере аҙ); **изо дня в день** көн дә, көн һайын, көн артынан көн (үтеү); **на́ день** бер көнгә, бер көнлөк; **на дню** *разг.* көнөнә; **на днях**; **э́тими дня́ми** ошо көндәрҙә, яңыраҡ; **не по дням, а по часа́м (расти́, возраста́ть и т.п.)** көнләп түгел, ә сәғәтләп (үҫеү); **пове́стка (поря́док) дня** көн тәртибе; **со дня на́ день**: 1) көндән-көнгә; 2) бөгөн-иртәгә, яҡын көндәрҙә; **счи́танные дни** һанаулы көндәр; **тре́тьего дня** элекке көн; **чёрный день** ауыр заман, ҡыйынлыҡ килгән мәл

**ДЕ́НЬГИ** *только мн.* аҡса; **бума́жные де́ньги** ҡағыҙ аҡса; **нали́чные де́ньги** ҡулаҡса; **разменя́ть де́ньги** аҡса ваҡлау ♦ **бе́шеные де́ньги** сиктән тыш күп аҡса; **шальны́е де́ньги** көс түкмәйенсә, еңел табылған (елдән килгән) күп аҡса; **броса́ть де́ньги на ве́тер** аҡсаны әрәм-шәрәм итеү; **ни за каки́е де́ньги** әллә ни бирһәләр ҙә (*низер эшләгe килмәү*); **при деньга́х (быть)** аҡсалы булыу, янда аҡса йөрөтөү

**ДЕПАРТА́МЕНТ** *м* департамент (**1.** *Францияла, ҡайһы бер дәүләттәрҙә административ-территориаль берәмек* **2.** *революцияға тиклем Рәсәйҙә һәм ҡайһы бер илдәрҙә юғары дәүләт учреждениеларының министрлыҡ бүлеге* **3.** *АҠШ-та тышҡы эштәр, сауҙа һ.б. министрлыҡтар*)

**ДЕПЕ́ША** *ж* депеша (**1.** *дип. ашығыс дипломатик белдереү* **2.** *иҫк. телеграмма, ашығыс хәбәр*)

**ДЕПО́** *с нескл.* депо (**1.** *локомотивты, вагондарҙы йүнәтеү һәм һаҡлау бинаһы* **2.** *янғын машиналары торған урын*)

**ДЕПОЗИ́Т** *м*; *фин.* депозит (*кредит учреждениеһына һаҡлау һ.б. маҡсат менән һалынған аҡса йәки ҡиммәтле ҡағыҙҙар*)

**ДЕПОНЕ́НТ** *м*; *фин.* депонент (*депозит һалыусы*)

**ДЕПОНИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* **1.** *фин.* депозитҡа һалыу (индереү) **2.** *юр.* депонирлау, һаҡлауға биреү

**ДЕПРЕССИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое депрессив, депрессия ...ы; **депресси́вный пери́од** депрессия осоро; **депресси́вное состоя́ние** депрессия хәле

**ДЕПРЕ́ССИЯ** *ж* **1.** *эк.* депрессия, торғонлоҡ (*хужалыҡ системаһында кризистан һуң килә торған осор*); **экономи́ческая депре́ссия** иҡтисади депрессия **2.** *мед.* депрессия, төшөнкөлөк; **впада́ть в депре́ссию** депрессияға бирелеү

**ДЕПУТА́Т** *м* депутат; **депута́т Законода́тельной пала́ты** Закондар сығарыу палатаһы депутаты

**ДЕПУТА́ТСКИЙ,** -ая, -ое депутат ...ы, депутатлыҡ ...ы; **депута́тский манда́т** депутатлыҡ мандаты; **депута́тская де́ятельность** депутат эшмәкәрлеге; **депута́тские обя́занности** депутат бурыстары

**ДЕПУТА́ЦИЯ** *ж* депутация, вәкилдәр

**ДЁР: зада́ть (дать) дёру** *прост.* табан ялтыратыу, һыҙыу (*ҡасып китеү*)

**ДЕ́РБИ** *с нескл.*; *спорт.* бәйге, сабыш

**ДЕ́РВИШ** и *уст.* **ДЕРВИ́Ш** *м* дәрүиш

**ДЁРГАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* тартыу; **дёргать за́ уши** ҡолағынан тартыу **2.** *что*; *разг.* йолҡоу; (*о зубах*) һурыу, һурҙырыу, алдырыу; **дёргать коноплю́** киндер йолҡоу; **дёргать зу́бы** теш һурыу **3.** *кого-что* и *без доп. безл.* тартышыу; **его́ всего́ дёргает** уның бөтә кәүҙәһе тартыша **4.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* йөҙәтеү, ыҙалатыу, йәненә тейеү; **дёргать подчинённых** ҡул аҫтындағы кешеләрҙе (юҡ-бар менән) йөҙәтеү

**ДЁРГАТЬСЯ** *несов.* **1.** тартыу, тартышыу; **те́ло больно́го дёргается** ауырыуҙың тәне тартыша **2.** *страд. от* **дёргать** 2

**ДЕРГА́Ч I** *м* тартай (*ҡош*)

**ДЕРГА́Ч II** *м* сөй һурғыс

**ДЕРЕВЕНЕ́ТЬ** *несов.* ҡатыу, ойоу (*тәндең ойоп иҫһеҙләнеүе*); **па́льцы деревене́ют** бармаҡтар ҡата

**ДЕРЕВЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое ауыл …ы; **деревенский па́рень** ауыл егете; **деревенская у́лица** ауыл урамы

**ДЕРЕВЕ́НЩИНА** *ж*; *прост.* ауыл кешеһе (*аңһыҙ, тупаҫыраҡ кешегә ҡарата*)

**ДЕРЕ́ВНЯ** *ж* **1.** ауыл; **стари́нная дере́вня** боронғо ауыл **2.** *собир.* ауыл, ауыл кешеләре; **вся дере́вня на сеноко́се** бөтә ауыл (халҡы) бесәндә

**ДЕ́РЕВО** *с* ағас; **ли́ственные дере́вья** япраҡлы ағастар; **хво́йные дере́вья** ылыҫлы ағастар; **де́рево для постро́йки до́ма** өй һалырлыҡ ағас; **резьба́ по де́реву** ағас һырлау (семәрләү) сәнғәте

**ДЕРЕВООБДЕ́ЛОЧНИК** *м* ағас эшкәртеүсе, ағас оҫтаһы

**ДЕРЕВООБДЕ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое ағас эшкәртеү …ы; **деревообде́лочный стано́к** ағас эшкәртеү станогы

**ДЕРЕВООБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее ағас эшкәртеү …ы, ағас эшкәртә торған; **деревообраба́тывающая фа́брика** ағас эшкәртеү фабрикаһы

**ДЕРЕВООБРАБО́ТКА** *ж* ағас эшкәртеү

**ДЕРЕВЯНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ағас һымаҡ, ағасҡа оҡшаған; **деревяни́стое строе́ние вещества́** төҙөлөшө ағас һымаҡ матдә **2.** *перен.* ағас кеүек (ҡаты, тәмһеҙ); **деревяни́стое я́блоко** ағас кеүек ҡаты алма

**ДЕРЕВЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ағас …ы; **деревя́нный дом** ағас өй **2.** *перен.* ағас, туң, йәнһеҙ, хисһеҙ; **деревя́нное лицо́** туң сырай ♦ **деревя́нное ма́сло** ағас майы (*зәйтүн майының түбән сорты*)

**ДЕРЕВЯ́ШКА** *ж* **1.** ағас киҫәге, түмәр **2.** *разг.* (*деревянная нога*) ағас аяҡ

**ДЕРЖА́ВА** *ж* держава (**1.** *юғары бойондороҡһоҙ дәүләт* **2.** *тар.* *өҫтөнә тәре беркетеп эшләнгән, Рәсәй монархияһының символы булған алтын шар*)

**ДЕРЖА́ВНЫЙ,** -ая, -ое *высок.*, *уст.* **1.** юғары (сикһеҙ) властлы; **держа́вный влады́ка** юғары властлы хаким **2.** (*могущественный, величественный*) ҡеүәтле, ҡөҙрәтле; **держа́вная власть наро́да** ҡеүәтле халыҡ власы

**ДЕРЖА́ТЕЛЬ** *м* **1.** хужа, эйә, биләүсе; **держа́тель за́йма** заём хужаһы **2.** беркеткес, тотҡос; **держа́тель для бума́г** ҡағыҙ беркеткес

**ДЕРЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* тотоу, тотоп тороу; **держа́ть ребёнка** баланы тотоп тороу; **держа́ть ло́жку** ҡалаҡ тотоу **2.** *что* тотоу, һаҡлау; **держа́ть де́ньги в ба́нке** аҡсаны банкыла һаҡлау **3.** *кого-что* тотоу, аҫрау; **держа́ть кро́ликов** йорт ҡуяны аҫрау **4.** һаҡта (биктә) тотоу; **держа́ть в плену́** әсирлектә тотоу **5.** *без доп.*; *прост.* тотоу, тартыу; **держа́ть пря́мо** тура тотоу; **держа́ть впра́во** уңға тартыу ♦ **держа́ть в ежо́вых рукави́цах** *кого* ҡаты тотоу; **держа́ть в ку́рсе** *кого-что* белгертеп тороу, хәбәр итеп тороу; **держа́ть в мы́слях** *что* башта (иҫтә) тотоу, баштан (иҫтән) сығармау; **держа́ть в та́йне** сер итеп тотоу; **держа́ть в узде́** *кого* ауыҙлыҡлап (йүгәнләп) тотоу, буйһондороп тотоу; **держа́ть в чёрном те́ле** *кого* көн күрһәтмәү; **держа́ть в уме́** иҫтә (хәтерҙә) тотоу, онотмау; **держа́ть нос по́ ветру** файҙаһы тейерҙәй яҡҡа ауырға әҙер тороу; **держа́ть у́хо востро́** уяу (һаҡ) булыу; **держа́ть оборо́ну** оборона тотоу; **держа́ть пари́** бәхәс итеү, бәхәсләшеү; **держа́ть под замко́м** *кого-что*: 1) бикләп тотоу; 2) иркен ҡуймау, иректә йөрөтмәү; **держа́ть при себе́** сер (һүҙ) сығармау, сер һаҡлау; **держа́ть путь** юлда булыу, юлланыу; **держа́ть речь** нотоҡ һөйләү, телмәр тотоу; **держа́ть своё сло́во** үҙ һүҙеңдә тороу, һүҙҙе боҙмау; **держа́ть себя́** үҙеңде тотоу, үҙеңде тота белеү; **держа́ть себя́ в рука́х** үҙеңде ҡулға алыу; **держа́ть сто́рону** *кого*, *чью берәй кеше* яҡлы булыу; **держа́ть экза́мен** имтихан тотоу (тапшырыу); **держа́ть язы́к за зуба́ми** телде тыйыу, сер һаҡлау; **держи́ карма́н ши́ре**! тот ҡапсығыңды!; **но́ги не де́ржат** баҫып торорлоҡ түгел (*арыуҙан, хәлһеҙлектән*); **так держа́ть!** хуп! шулай булығыҙ! шулай дауам ит(егеҙ)!

**ДЕРЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *за кого-что* тотоноу, тотоноп (йәбешеп) тороу; **ребёнок де́ржится за мать** бала әсәһенә тотоноп тора **2.** *за что*; *перен.* йәбешеп ятыу, ысҡындырмаҫҡа тырышыу; **держа́ться за свою́ до́лжность** үҙенең вазифаһына йәбешеп ятыу **3.** тороу, эләгеп тороу; **пу́говица е́ле-е́ле де́ржится** төймә саҡ-саҡ эләгеп тора; **держа́ться на подпо́рке** терәүҙә тороу **4.** *за что* тотоноп, тотоп тороу; **держа́ться за больно́е ме́сто** ауыртҡан ерен тотоп тороу **5.** *прям.*, *перен.* үҙен тотоу; **он де́ржится пря́мо** ул үҙен тура тота; **держа́ться в стороне́** ситтә тороу, ситләшеү; **он де́ржится скро́мно** ул үҙен ба-

çалҡы тота **6.** *чего, за кем-чем* яндан, эргәләп барыу; **держáться прáвого бéрега** уң яҡ ярҙы эргәләп барыу **7.** бирелмәү, бирешмәү, ҡаршы тороу; **держáться до послéднего патрóна** һуңғы патрон ҡалғансы бирелмәү **8.** *чего*; *перен.* тотоу, тороу, (буйынса) эш итеү; **держáться определённых прáвил** билдәле ҡағиҙәләрҙе тотоу; **держáться своегó мнéния** үҙ фекереңдә тороу **9.** тороу, һаҡланыу, барыу; **холодá держáлись недóлго** һалҡындар оҙаҡ торманы; **стáрые обы́чаи дéржатся дóлго** иҫке ғөрөф-ғәҙәт оҙаҡ һаҡлана **10.** *страд. от* **держáть** 1—4 ♦ **в чём душá (тóлько) дéржится** ныҡ ябыҡ, тире лә һөйәк, ауырыу; **держáться на волоскé** йәне ҡыл өҫтөндә тороу; **едвá (éле) держáться на ногáх** аяҡта саҡ баҫып тороу (*арыуҙан, иҫереп һ.б.*); **тóлько держи́сь** сыҙап ҡына тор, ҡайһы ереҥ ҡысыта

**ДЕРЗÁНИЕ** *с*; *высок.* дәртле ынтылыш, ҡыйыу теләк, тәүәккәллек; **дерзáния молоды́х сердéц** йәш йөрәктәрҙең дәртле ынтылышы

**ДЕРЗÁТЬ** *несов.*; *высок.* ҡыйыу ынтылыу, эшкә ҡыйыу тотоноу, тәүәккәллек күрһәтеү

**ДЕРЗИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* әрепләшеү, ҡарыулашыу, ҡаршы һүҙ әйтеү

**ДÉРЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** әҙәпһеҙ, тупаҫ; **дéрзкий поступок** әҙәпһеҙ ҡылыныш **2.** *высок.* (*смелый*) ҡыйыу, тәүәккәл; **дéрзкий человéк** тәүәккәл кеше

**ДЕРЗНОВÉНИЕ** *с*; *высок.*, *уст. см.* **дерзáние**

**ДЕРЗНОВÉННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст. см.* **дéрзкий** 1; **2.** *высок.* ҡыйыу, тәүәккәл

**ДЕРЗНУ́ТЬ** *сов.* батырсылыҡ (тәүәккәллек) итеү, ҡыйыулыҡ итеү; **дерзну́ть обрати́ться** мөрәжәғәт итергә батырсылыҡ итеү

**ДÉРЗОСТЬ** *ж* **1.** әҙәпһеҙлек, тупаҫлыҡ, тупаҫ һүҙ; **говори́ть дéрзости** тупаҫ һүҙҙәр әйтеү **2.** (*смелость*) ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек

**ДЕРИВÁЦИЯ** *ж*; *спец.* деривация (**1.** *снарядтың, пуляның осҡанда ситкә тайпылыуы* **2.** *суднолар йөрөй торған йылғаның һыуын төрлө маҡсат менән каналдар буйлап ситкә ебәреү* **3.** *грам. һүҙ яһаусы саралар ҡулланып яңы һүҙҙәр яһау*)

**ДЕРМАТИ́Н** *м* дерматин (*яһалма күн*)

**ДЕРМАТИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое дерматин; **дермати́новая облóжка** дерматин тышлыҡ

**ДЕРМАТÓЛОГ** *м* дерматолог, дерматология белгесе

**ДЕРМАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дерматологик, дерматология ...ы; **дерматологи́ческий диспансéр** дерматология диспансеры

**ДЕРМАТОЛÓГИЯ** *ж* дерматология (*медицинаның тире ауырыуҙарын өйрәнә һәм дауалай торған тармағы*)

**ДЁРН** *м* кәҫ, сиҙәм ҡыртышы; **срéзать дёрн** кәҫ ҡырҡыу

**ДЕРНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡыртышлы, кәҫле, сиҙәм; **дерни́стая пóчва** кәҫле тупраҡ

**ДЕРНÓВЫЙ,** -ая, -ое кәҫ, кәҫтән яһалған, кәҫ йәйелгән; **дернóвая кры́ша** кәҫ түбә

**ДЁРНУТЬ** *сов. кого-что* тартыу, ҡапыл тартып ебәреү (ҡуйыу) ♦ **чёрт дёрнул**; **нелёгкая дёрнула** ҡабырғаға шайтан төрттөмө ни; **дёрнуло за язы́к** *кого*; *прост.* телдән тарттылармы ни, теле ҡысып (оҙонайып, ауыҙына һыймай) (*тейеш түгелде әйтеп һалғанда*)

**ДЁРНУТЬСЯ** *сов. см.* **дёргаться**

**ДЕРЮ́ГА** *ж* **1.** тупаҫ киндер туҡыма **2.** турпыша, сепрәк балаҫ **3.** *разг.* тупаҫ туҡыманан тегелгән кейем

**ДЕРЮ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тупаҫ киндерҙән тегелгән

**ДЕСÁНТ** *м* десант; **возду́шный десáнт** һауа десанты

**ДЕСÁНТНИК** *м* десантсы; **служи́ть десáнтником** десантсы булып хеҙмәт итеү

**ДЕСÁНТНЫЙ,** -ая, -ое десант ...ы; **десáнтные войскá** десант ғәскәрҙәре

**ДЕСÉРТ** *м* десерт (*аштан һуң бирелә торған тәм-том*)

**ДЕСÉРТНЫЙ,** -ая, -ое десерт ...ы; **десéртное блю́до** десерт ашамлыҡ (тәм-том)

**ДÉСКАТЬ** *частица*; *прост.* (*при передаче чужой речи*) имеш, йәнәһе, ти, тиҙәр; **дéскать, он сам верну́лся** имеш, ул үҙе ҡайтҡан

**ДЕСНÁ** *ж*; *анат.* теш ите, теш ҡаҙнаһы

**ДЕСНИ́ЦА** *ж*; *трад.-поэт.* уң ҡул, ҡул

**ДÉСПОТ** *м* **1.** деспот (*сикләнмәгән власть эйәһе, хаким*) **2.** *перен.* залим (*мәрхәмәтһеҙ, ҡаты бәғерле кеше*)

**ДЕСПОТИ́ЗМ** *м* деспотизм, деспотлыҡ, залимлыҡ

**ДЕСПОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** деспотлыҡҡа нигеҙләнгән; **деспоти́ческое госудáрство** деспотлыҡҡа нигеҙләнгән дәүләт **2.** *перен.* залим, мәрхәмәтһеҙ, аяу белмәгән; **деспоти́ческий харáктер** мәрхәмәтһеҙ холоҡ

**ДЕСПОТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **деспоти́ческий** 2

**ДЕСПОТИ́Я** *ж* деспотия (*деспот идаралығындағы дәүләт*)

**ДÉСЯТЕРО** *числ. собир.* ун, унау; **дéсятеро человéк** ун кеше

**ДЕСЯТИБÓРЕЦ** *м*; *спорт.* ун төрлө ярышта ҡатнашыусы, унбәйгесе

**ДЕСЯТИБÓРЬЕ** *с*; *спорт.* ун төрлө ярыш, унбәйге

**ДЕСЯТИДНÉВКА** *ж* декада, ун көн, ун көнлөк

**ДЕСЯТИКЛÁССНИК** *м* и **ДЕСЯТИКЛÁССНИЦА** *ж* унынсы синыф уҡыусыһы, унынсы синыфта уҡыусы

**ДЕСЯТИКОПÉЕЧНЫЙ,** -ая, -ое ун тинлек, ун тин торған; **десятикопéечная монéта** ун тинлек аҡса; **десятикопéечный билéт** ун тинлек билет

**ДЕСЯТИКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое ун тапҡыр арттырылған, унлата

**ДЕСЯТИЛЕ́ТИЕ** *с* **1.** (*срок*) ун йыл **2.** (*годовщина*) ун йыллыҡ; **десятиле́тие институ́та** институттың ун йыллығы

**ДЕСЯТИЛЕ́ТКА** *ж*; *разг.* ун йыллыҡ мәктәп, урта мәктәп

**ДЕСЯТИЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о сроке*) ун йыллыҡ **2.** (*о возрасте*) ун йәшлек (йәштәге), ундағы

**ДЕСЯТИ́НА** *ж*; *ист.* дисәтинә (*элекке замандағы ер үлсәү берәмеге — 1,09 гектар*)

**ДЕСЯТИРУБЛЁВКА** *ж*; *разг.* ун һумлыҡ (*аҡса*)

**ДЕСЯТИРУБЛЁВЫЙ,** -ая, -ое ун һумлыҡ, ун һум торған; **десятирублёвый биле́т** ун һумлыҡ билет

**ДЕСЯТИТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* ун меңенсе **2.** ун меңлек

**ДЕСЯТИЧАСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*продолжающийся десять часов*) ун сәғәтлек **2.** ундағы, сәғәт унда килә (китә) торған; **десятичасово́й по́езд** сәғәт унда килә торған поезд

**ДЕСЯТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое унарлы ♦ **десяти́чная дробь** *мат.* унарлы кәсер; **десяти́чные весы́** унарлы үлсәү (*бындай үлсәүҙә әйбер үҙенән ун тапҡыр еңелерәк гер менән үлсәнә*)

**ДЕСЯ́ТКА** *ж*; *разг.* **1.** унлыҡ (*аҡса, цифр, кәрт*) **2.** унынсы (*трамвай, троллейбус һ.б.*)

**ДЕСЯ́ТНИК** *м* десятник (*бер төркөм эшселәрҙең етәксеһе йәки техник*)

**ДЕСЯ́ТОК** *м* тиҫтә, ун; **десяток яи́ц** бер тиҫтә йомортҡа; **ему́ пошёл шесто́й деся́ток** уға алтынсы тиҫтә китте, ул алтынсы тиҫтәне ҡыуа

**ДЕСЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* унынсы; **деся́тый ряд** унынсы рәт

**ДЕ́СЯТЬ** *числ.* ун; **де́сять часо́в утра́** сәғәт иртәнге ун

**ДЕТАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **детализи́ровать**

**ДЕТАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* деталләштереү, ентекләп эшләү; **детализи́ровать програ́мму** программаны ентекләп эшләп сығыу

**ДЕТА́ЛЬ** *ж* **1.** деталь, өлөш, киҫәк; **дета́ли дви́гателя маши́ны** машина двигателенең деталдәре **2.** ваҡ-төйәк, ваҡлыҡ; **написа́ть со все́ми дета́лями** ваҡ-төйәктәрен ҡалдырмай яҙыу

**ДЕТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ентекле, бәйнә-бәйнә; **дета́льный разбо́р** ентекле тикшереү

**ДЕТВА́** *ж собир.*; *пчел.* бала ҡорт, йәш ҡорт

**ДЕТВОРА́** *ж собир.*; *разг.* бала-саға, балалар

**ДЕТДО́М** *м* (*детский дом*) балалар йорто

**ДЕТЕКТИ́В** *м* детектив (**1.** *йәшерен полиция агенты, шымсы* **2.** *шымсылар тураһында әҙәби әҫәр йәки кинофильм*)

**ДЕТЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое детектив, мажаралы; **детекти́вный рома́н** детектив (мажаралы) роман

**ДЕТЕ́КТОР** *м* детектор (**1.** *юғары йышлыҡтағы радио тулҡындарын ҡолаҡ менән ишетерлек түбән йышлыҡтағы тулҡындарға әйләндереүсе прибор* **2.** *яҡтылыҡты, йылылыҡты билдәләй торған прибор*)

**ДЕТЕ́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое детекторлы; **дете́кторный приёмник** детекторлы радиоалғыс

**ДЕТЁНЫШ** *м* бала (*йәнлектең*); **детёныш во́лка** бүре балаһы

**ДЕТЕРМИНИ́ЗМ** *м*; *филос.* детерминизм (*бөтә күренештәрҙең, ваҡиғаларҙың законлылығы һәм уларҙың сәбәп-нәтижәле бәйләнештә булыуы тураһындағы тәғлимәт*)

**ДЕ́ТИ** *мн.* (*ед.* **дитя́** *с*) балалар, бала-саға ♦ **не дете́й крести́ть** *кому, с кем* ҡоҙа-ҡоҙағый түгел әле, туғанлашырға йыйынмайым; *см.* **дитя́**

**ДЕТИ́НА** *м*; *разг.* әзмәүер (*кеҫек*), әзмәүерҙәй йәш кеше, типһә тимер өҙөрҙәй (*ирегет*)

**ДЕ́ТИЩЕ** *с* **1.** *уст.* бала **2.** *перен.* ҡаҙаныш, емеш, нәтижә; **э́тот рома́н — де́тище изве́стного писа́теля** был роман — билдәле яҙыусының ҡаҙанышы

**ДЕ́ТКА** *ж*; *разг. ласк.*, балаҡай

**ДЕТОНА́ТОР** *м*; *спец.* детонатор (**1.** *шартлатҡыс матдә* **2.** *шартлатҡыс капсула, запал*)

**ДЕТОНА́ЦИЯ** *ж*; *спец.* детонация (*бер шартлау йәки бәрелеү арҡаһында бик тиҙ икенсе шартлау сығыу*)

**ДЕТОНИ́РОВАТЬ** *несов.*; *спец.* детонация менән шартлау

**ДЕТОРОЖДЕ́НИЕ** *с* бала табыу (тыуҙырыу), бәпесләү

**ДЕТОУБИ́ЙСТВО** *с* бала үлтереү

**ДЕТОУБИ́ЙЦА** *м* и *ж* бала үлтереүсе

**ДЕТРИ́Т** *м*; *мед.* детрит (*сәсәк ауырыуына ҡаршы прививка яһау өсөн препарат*)

**ДЕТСА́Д** *м* (*детский сад*) балалар баҡсаһы

**ДЕ́ТСКАЯ** *ж* балалар бүлмәһе; **игра́ть в де́тской** балалар бүлмәһендә уйнау

**ДЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** балалар ...ы; **де́тская литерату́ра** балалар әҙәбиәте; **де́тские и́гры** балалар уйыны **2.** бала ...ы; **де́тский го́лос** бала тауышы **3.** балаларса, сабыйҙарса, балалары ...ы, балалыҡ ...ы, балаларға хас; **де́тское рассужде́ние** балаларса (балаларға хас) фекерләү ♦ **де́тский городо́к** балалар ҡаласығы; **де́тский мир** балалар донъяһы (*магазин*); **де́тский сад** *см.* **детса́д**; **де́тское ме́сто** *анат.* һуңғылыҡ, бала яткыһы

**ДЕ́ТСТВО** *с* бала саҡ, балалыҡ ваҡыты, балалыҡ, сабыйлыҡ ♦ **впасть в де́тство** бала аҡылы инеү, аҡылы алмашыныу

**ДЕТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** ҡуйыу, итеү, тығыу; **куда́ де́ли кни́гу?** китапты ҡайҙа ҡуйҙығыҙ? **2.** *что* (*израсходовать*) тотоу, итеү; **не знать, куда́ деть де́ньги** аҡсаны ҡайҙа тоторға

белмәү **3.** *кого-что* (*поместить*) урынлаштырыу, ҡуйыу ♦ **деть не́куда** ҡуйыр урын юҡ; **не знать куда́ глаза́ деть** күҙҙе ҡайҙа йәшерергә белмәү (*оялыуҙан, аптырауҙан*); **не знать куда́ ру́ки деть** ҡулды ҡайҙа итергә белмәү (*уңайһыҙланыуҙан*)

**ДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*исчезнуть, потеряться*) юғалыу, юҡ булыу; **куда́ де́лся каранда́ш?** ҡәләм ҡайҙа булды? **2.** (*скрыться от кого-чего-л.*) инеү, йәшенеү; **не́куда де́ться от стыда́** оялыштан ҡайҙа инергә урын тапмау **3.** (*найти приют*) баш терәү, һыйыныу

**ДЕ-ФА́КТО** *нареч.*; *книжн.* ғәмәлдә, асылда

**ДЕФЕ́КТ** *м* дефект, кәмселек, етешһеҙлек, етешһеҙ (кәмселекле) яҡ

**ДЕФЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое зәғиф (*физик йәки психик яҡтан*)

**ДЕФЕ́КТНОСТЬ** *ж* боҙоҡлоҡ, кәмселек; **дефе́ктность дета́ли** деталдең боҙоҡлоғо

**ДЕФЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое кәмселекле, етешһеҙлекле

**ДЕФЕКТОЛО́ГИЯ** *ж* дефектология (*физик йәки психик яҡтан камил булмаған балаларҙы өйрәнеү, уҡытыу, тәрбиәләү тураһындағы фән*)

**ДЕФИНИ́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* ҡыҫҡа ғына аңлатма (төшөнсә) биреү, билдәләмә

**ДЕФИ́С** *м* дефис, һыҙыҡса

**ДЕФИЦИ́Т** *м* **1.** (*убыток*) дефицит, зыян, зарар **2.** (*недостаток, нехватка*) дефицит, етешмәү, етешмәүлек; **дефици́т милосе́рдия** шәфҡәтлелек етешмәү **3.** (*дефицитная вещь*) дефицит (етмәгән) әйбер

**ДЕФИЦИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*убыточный*) зарарлы, зыянлы **2.** дефицит(лы), етешмәгән, аҙ булған; **дефици́тный това́р** дефицит тауар

**ДЕФОРМА́ЦИЯ** *ж* деформация (*есемдең формаһы йәки күләме үҙгәреү*)

**ДЕФОРМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* формаһын үҙгәртеү (боҙоу); **деформи́ровать колесо́** тәгәрмәстең формаһын үҙгәртеү

**ДЕФОРМИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* формаһы үҙгәреү (боҙолоу) **2.** *несов. страд. от* **деформи́ровать**

**ДЕХКА́НИН** *м* и **ДЕХКА́НКА** *ж* диһҡан (*Урта Азия крәҫтиәне*)

**ДЕЦЕНТРАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* децентрализация (**1.** *үҙәк хакимиәттең ҡайһы бер функцияларын урындағы хакимиәткә тапшырыуы* **2.** *үҙәкләштереү системаһын йомшарта төшөү*)

**ДЕЦИБЕ́Л** *м*; *физ.* децибел (*тауыш көсөн үлсәү берәмеге*)

**ДЕЦИМЕ́ТР** *м* дециметр (*ун сантиметр*)

**ДЕШЕВЕ́ТЬ** *несов.* осһоҙланыу, арзанайыу, хаҡы төшөү

**ДЕШЕВИ́ЗНА** *ж* арзан булыу, осһоҙлоҡ, арзанлыҡ; **дешеви́зна ры́нка** баҙарҙың арзан булыуы

**ДЕШЁВКА** *ж*; *разг.* **1.** бик арзан, осһоҙ, (бик) түбән хаҡлы; **прода́ть по дешёвке** бик осһоҙға һатыу **2.** *перен., пренебр.* (*безвкусица*) мәғәнәһеҙ, буш, тоҙһоҙ (нәмә); **написа́ть дешёвку** буш нәмә яҙыу

**ДЁШЕВО** *нареч.* **1.** осһоҙ, арзан **2.** анһат, еңел; **дёшево обхо́дится** еңелгә тура килә ♦ **дёшево и серди́то** осһоҙ ҙа, шәп тә; **дёшево отде́латься** анһат ҡотолоу; **дёшево сто́ить** бер тин тормай

**ДЕШЁВЫЙ,** -ая, -ое **1.** осһоҙ(ло), арзан(лы); **дешёвые това́ры** арзан тауарҙар **2.** *перен.* мәғәнәһеҙ, буш, осһоҙ, тоҙһоҙ; **дешёвые шу́точки** мәғәнәһеҙ шаяртыу; **дешёвый успе́х** осһоҙ уңыш

**ДЕШИФРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* дешифровкалау, шифровканы табыу (табып уҡыу); **дешифрова́ть текст** тексттың шифровкаһын табып уҡыу

**ДЕ-Ю́РЕ** *нареч.*; *книжн.* де-юре (*юридик йәһәттән, рәсми рәүештә, формаль яҡтан*)

**ДЕЯ́НИЕ** *с*; *высок.* эш; **вели́кие дея́ния** бөйөк эштәр

**ДЕ́ЯТЕЛЬ** *м* эшмәкәр; **госуда́рственный де́ятель** дәүләт эшмәкәре; **заслу́женный де́ятель нау́ки** атҡаҙанған фән эшмәкәре

**ДЕ́ЯТЕЛЬНО** *нареч.* егәрле, ең һыҙғанып, эшлекле рәүештә; **де́ятельно взя́ться за рабо́ту** эшкә ең һыҙғанып тотоноу

**ДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** *ж* эшмәкәрлек; **нау́чная де́ятельность** ғилми эшмәкәрлек

**ДЕ́ЯТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эшмәкәр, эшлекле, егәрле; **де́ятельный челове́к** эшлекле кеше; **принима́ть де́ятельное уча́стие** эшлекле ҡатнашыу

**ДЖАЗ** *м* джаз (**1.** *көңгөл асыу, бейеү музыкаһы* **2.** *ошо музыканы уйнаған оркестр, йырсы*)

**ДЖА́ЗОВЫЙ,** -ая, -ое джаз ...ы; **джа́зовая му́зыка** джаз музыкаһы; **джа́зовый орке́стр** джаз оркестры

**ДЖЕЙРА́Н** *м* йәйрән

**ДЖЕМ** *м* джем; **джем из я́блок** алма джемы, алманан яһалған джем; **кали́новый джем** балан джемы

**ДЖЕ́МПЕР** *м* джемпер (*бәйләнгән яғаһыҙ кофта*)

**ДЖЕНТЛЬМЕ́Н** *м* джентльмен (**1.** *Англияла юғары буржуаз-аристократик йәмғиәт ҡуйған әхлаҡ, тәртип ҡағиҙәләрен теүәл үтәүсе* **2.** *әҙәпле, тәрбиәле, үҙен тота һәм килешле кейенә белгән кеше*); **сло́во джентльме́на** джентльмен һүҙе

**ДЖЕНТЛЬМЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое джентльмендарса, джентльмен ...ы; **джентльме́нское сло́во** джентльмен һүҙе ♦ **джентльме́нское соглаше́ние** *дип.* дәүләттәрҙең үҙ-ара һөйләшеп килешеүе

**ДЖЕРСИ́** и **ДЖЕ́РСИ** *с нескл.* джерси (*йөн йәки ебәк трикотаж туҡыма һәм шунан тегелгән кейем*); **пальто́ из джерси́** джерси пальто

**ДЖЕРСО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* джерси …ы, джерсиҙан тегелгән; **джерсо́вый костю́м** джерси костюм

**ДЖИГИ́Т** *м* егет (*ат өҫтөндә оҫта йөрөүсе*)

**ДЖИГИТОВА́ТЬ** *несов.* ат өҫтөндә оҫта йөрөү

**ДЖИГИТО́ВКА** *ж см.* **джигитова́ть**

**ДЖИН** *м* джин (*артыштан яһалған Англия араҡыһы*)

**ДЖИНН** *м*; *миф.* ен; **до́брый джинн** изге күңелле ен ♦ **вы́пустить джи́нна из буты́лки** ендәрҙе иреккә сығарыу, уҫал көстәргә ирек биреү

**ДЖИ́НСОВЫЙ** и **ДЖИНСО́ВЫЙ,** -ая, -ое джинсы (*беше кизе-мамыҡ туҡыма һәм ошондай туҡыманан тегелгән кейем*); **джи́нсовый материа́л** джинсы материал; **джи́нсовое пла́тье** джинсы күлдәк

**ДЖИ́НСЫ** *только мн.* джинсы (*джинсы туҡыманан тегелгән салбар*); **ходи́ть в джи́нсах** джинсы кейеп йөрөү; **фи́рменные джи́нсы** фирма джинсыһы

**ДЖИП** *м* джип (**1.** *еңел хәрби автомобиль* **2.** *бәләкәй генә йөк машинаһы төрө*)

**ДЖИ́У-ДЖИ́ТСУ** *с нескл.*; *спорт.* джиу-джитсу (*япондарҙа ҡоралһыҙ һаҡланыу һәм һөжүм итеү алымдары системаһы*)

**ДЖО́НКА** *ж*; *мор.* джонка (*Ҡытайҙа елкәнле кәмә*)

**ДЖУ́НГЛИ** *только мн.* джунгли (*кеше үтә алмаҫлыҡ һаҙлыҡлы, ҡуйы тропик урман*) ♦ **зако́н джу́нглей** джунглиҙар ҡануны (*асыҡтан-асыҡ көс ҡулланыу һәм башбаштаҡланыуға ҡарата*)

**ДЖУТ I** *м* джут, һинд сүсе (*йүкәләр ғаиләһенә ҡараған бер йыллыҡ үҫемлек*)

**ДЖУТ II** *м* йот, йотлоҡ (*мал ҡырылыу*)

**ДЖУ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** джут …ы; **джу́товые воло́кна** джут сүсе **2.** джут сүсенән -ған/-гән; **джу́товый кана́т** джут сүсенән ишелгән арҡан

**ДЗОТ** *м* дзот; **амбразу́ра дзо́та** дзот амбразураһы

**ДЗЮДО́** *с нескл.*; *спорт.* дзюдо (*джиу-джитсу алымдарына нигеҙләнгән ирекле стилдәге япон милли көрәше*)

**ДЗЮДОИ́СТ** *м* дзюдосы

**ДИАБА́З** *м* диабаз (*урамға түшәү өсөн һәм төҙөү эштәрендә ҡулланыла торған ҡаты тау тоҡомо*)

**ДИАБЕ́Т** *м*; *мед.* диабет (*бәүел күп бүленеүҙән ғибәрәт ауырыу*); **са́харный диабе́т** (*ҡанда шәкәрҙең күбәйеүе*)

**ДИАБЕ́ТИК** *м*; *разг.* диабет менән ауырыусы

**ДИА́ГНОЗ** *м*; *мед.* диагноз, ауырыуҙы билдәләү; **поста́вить диа́гноз** диагноз ҡуйыу (*ауырыуын билдәләү*)

**ДИАГНО́СТ** *м*; *мед.* диагнозсы, диагноз ҡуйыусы

**ДИАГНО́СТИКА** *ж* диагностика (**1.** *медицинаның диагноз ҡуйыу методикаһын өйрәнә торған бүлеге* **2.** *нимә менән ауырыуҙы билдәләү*)

**ДИАГНОСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ауырыуҙы билдәләү …ы, диагностик, диагноз ҡуйыу …ы; **диагности́ческое отделе́ние** ауырыуҙы билдәләү бүлеге

**ДИАГОНА́ЛЬ** *ж* диагональ (**1.** *мат.* *күпмөйөштөң йәки күп ҡырҙың ҡаршы мөйөштәрен тоташтырған тура һыҙыҡ* **2.** *ҡыя ҡырлы туҡыма*) ♦ **по диагона́ли (идти́, дви́гаться, располага́ться)** ҡыя, ҡыялап, ҡыйғас, ҡыйғаслап (барыу, хәрәкәт итеү, урынлашыу)

**ДИАГОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое диагональ, ҡыйыҡ …ы; **в диагона́льном направле́нии** ҡыйғаслап, ҡыйыҡ йүнәлештә

**ДИАГРА́ММА** *ж* диаграмма (*айырым бер дәүмәлдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен күрһәтеүсе һыҙма йәки таблица*); **диагра́мма ро́ста се́льского хозя́йства** ауыл хужалығы үҫеше диаграммаһы

**ДИАКРИТИ́ЧЕСКИЙ: диакрити́ческий знак** *лингв.* диакритик билдә (*бер үк хәреф менән билдәләнгән ике өндө бер-береһенән айырыр өсөн хәрефтең өҫтөнә йәки аҫтына ҡуйыла торған билдә, мәҫ., "ё" өҫтөндәге ике нөктә*)

**ДИАЛЕ́КТ** *м*; *лингв.* диалект, ерле һөйләш; **ю́жный диале́кт** көньяҡ диалект; **изуча́ть диале́кты** диалекттарҙы өйрәнеү

**ДИАЛЕКТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* *см.* **диале́ктный**

**ДИАЛЕКТИ́ЗМ** *м*; *лингв.* диалектизм (*әҙәби телгә ниндәй ҙә булһа бер диалекттан алынған һүҙҙәр йәки һүҙбәйләнештәр*)

**ДИАЛЕ́КТИК** *м*; *филос.* диалектик (*диалектик фәлсәфәне өйрәнеүсе йәки яҡлаусы*)

**ДИАЛЕ́КТИКА** *ж* диалектика (**1.** *фәлс.* *тәбиғәт, йәмғиәт һәм фекерләү процесының йәки үҫешенең дөйөм ҡанундарын өйрәнеүсе фәлсәфәүи фән* **2.** *тәбиғәт, йәмғиәт һәм фекер үҫеше процесы*)

**ДИАЛЕКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое диалектик; **диалекти́ческий материали́зм** диалектик материализм

**ДИАЛЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* диалект …ы, һөйләш …ы; **диале́ктные осо́бенности** диалект үҙенсәлектәре

**ДИАЛЕКТО́ЛОГ** *м*; *лингв.* диалектолог, диалектология буйынса белгес

**ДИАЛЕКТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* диалектологик, диалектология …ы; **диалектологи́ческий а́тлас** диалектологик атлас; **диалектологи́ческая экспеди́ция** диалектологик экспедиция

**ДИАЛЕКТОЛО́ГИЯ** *ж*; *лингв.* диалектология (*тел ғилеменең диалекттарҙы, һөйләштәрҙе өйрәнә торған бүлеге*)

**ДИАЛО́Г** *м* диалог (**1.** *ике йәки бер нисә кешенең ҡара-ҡаршы һөйләшеү формаһы* **2.** *әҙәби әҫәрҙә ике кешенең әңгәмәһен сағылдырған өлөш*)

**ДИАЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое диалогик; **диалоги́ческая речь** диалогик телмәр

**ДИАМА́Т** *м*; *разг.* (*диалектический материализм*) диамат (*диалектик материализм*)

**ДИА́МЕТР** *м*; *мат.* диаметр (*түңәрәктең арҡыры оҙонлоғо*)

**ДИАМЕТРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое диаметраль; **диаметра́льная пло́скость** диаметраль яҫылыҡ ♦ **диаметра́льная противополо́жность** бер-береһенә ҡапма-ҡаршылыҡ, бер-береһенә оҡшамағанлыҡ

**ДИАПАЗО́Н** *м* **1.** *муз.* диапазон (*йырсының йәки айырым музыка ҡоралының тауыш киңлеге*) **2.** *перен.*, *книжн.* күләм, киңлек, ҡолас, ҙурлыҡ; **диапазо́н зна́ний** белем киңлеге (тәрәнлеге)

**ДИАПОЗИТИ́В** *м*; *фото.* диапозитив (*проекцион фонарь менән күрһәтеү өсөн быялаға йәки плёнкаға төшөрөлгән фотоһүрәт*)

**ДИАТЕ́З** *м*; *мед.* әҫпе, диатез (*организмдың ҡайһы бер ашамлыҡтарға, бигерәк тә шәрбәткә кире реакцияһы, күберәк балаларҙа була*); **малышу́ нельзя́ дава́ть сла́дкое — у него́ диате́з** бәләкәскә шәрбәт бирергә ярамай — уның әҫпеһе ҡалҡа

**ДИАТЕРМИ́Я** *ж*; *мед.* диатермия (*берәй ағзаны дауалау маҡсатында юғары йышлыҡтағы электр тогы менән йылытыу*)

**ДИАТОНИ́ЧЕСКИЙ:** **диатони́ческая га́мма** *муз.* диатоник гамма (*бер тондан икенсе тонға күсеү*)

**ДИАФИ́ЛЬМ** *м* диафильм (*диапозитивтарҙан төҙөлгән фильм*)

**ДИАФРА́ГМА** *ж* диафрагма (**1.** *анат. күкрәк эсен ҡорһаҡтан айырып торған шаршау* **2.** *опт. фотоаппаратта һ.б. оптик приборҙарҙа уртаһы киңәйеп асыла, йә тарайып ябыла торған тимер шаршау*)

**ДИВА́Н I** *м* (*род мебели*) диван

**ДИВА́Н II** *м* диуан (**1.** *иҫк. Төркиәлә солтан тирәһендәге юғары дәрәжәле түрәләр кәңәше* **2.** *әҙ. Көнсығыш шағирҙарының шиғырҙар йыйынтығы*)

**ДИВА́Н-КРОВА́ТЬ** *м* диван-карауат

**ДИВЕРГЕ́НТ** *м*; *лингв.* дивергент (**1.** *өндөң фонологик варианты* **2.** *бер өндән айырылып, үҙ аллы үҫешеп киткән ике өндөң береһе, мәҫ., украин телендә "кинь"/"конь"*)

**ДИВЕРГЕ́НЦИЯ** *ж*; *лингв.* дивергенция (*өндәрҙең һүҙҙәге урынына ҡарап әйтелештә үҙгәреүе, вариант биреүе*)

**ДИВЕРСА́НТ** *м* диверсант, диверсия яһаусы

**ДИВЕРСА́НТСКИЙ,** -ая, -ое диверсант ...ы; **диверса́нтское снаряже́ние** диверсант ҡоралдары

**ДИВЕРСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое диверсион, диверсия ...ы; **диверсио́нная гру́ппа** диверсион төркөм; **диверсио́нные де́йствия** диверсия эштәре

**ДИВЕ́РСИЯ** *ж* диверсия (*хәрби йәки хөкүмәт объектын боҙоп, эшлектән сығарып, зыян яһау*)

**ДИВЕРТИСМЕ́НТ** *м* дивертисмент (*спектаклгә, концертҡа өҫтәмә рәүештә бирелгән музыкаль йәки драматик номерҙар*)

**ДИВИДЕ́НД** *м*; *эк.* дивиденд (*предприятиенең йыллыҡ табышынан пайсыларына пайының күләменә ҡарап бирелә торған табыш*)

**ДИВИЗИО́Н** *м* дивизион (**1.** *хәрб. артиллерия, бронетанк, кавалерия частарындағы ғәскәри берәмек* **2.** *диңг. бер типта булған караптарҙың берләшмәһе*)

**ДИВИЗИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дивизион, дивизия ...ы; **дивизио́нная артилле́рия** дивизия артиллерияһы

**ДИВИ́ЗИЯ** *ж*; *воен.* дивизия; **та́нковая диви́зия** танк дивизияһы

**ДИВИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* ғәжәпләнеү, таң ҡалыу, иҫ китеү; **я диви́лся его́ терпе́нию** уның сыҙамлығына минең иҫем китә ине

**ДИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һоҡланғыс, матур, бик шәп; **ди́вный го́лос** һоҡланғыс тауыш **2.** *разг.*, *уст.* (*удивительный*) ғәжәп, ғәжәйеп, иҫ киткес, һоҡландырғыс, ғәжәп матур; **ди́вный мост** иҫ киткес күпер

**ДИ́ВО** *с*; *разг.* белмәгән-күрмәгән нәмә, ғәжәп (иҫ киткес) хәл; **слы́шать про ди́во** ғәжәп хәл тураһында ишетеү ♦ **ди́во ди́вное** иҫ киткес, ғәжәп нәмә (күренеш); **ди́ву да́ться** ғәжәпләнеү, иҫ китеү; **на ди́во** иҫ киткес, ғәжәйеп

**ДИВЧИ́НА** *ж*; *прост. см.* **де́вушка**

**ДИДА́КТИКА** *ж* **1.** дидактика (*педагогиканың уҡытыу йөкмәткеһе, ысулдары һәм формалары тураһындағы белеме*) **2.** өгөт-нәсихәт

**ДИДАКТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** дидактик, дидактика ...ы; **дидакти́ческие при́нципы** дидактик принциптар **2.** өгөт-нәсихәтле, өгөтлө; **дидакти́ческая бесе́да** өгөт-нәсихәтле әңгәмә; **дидакти́ческая литерату́ра** өгөт-нәсихәтле әҙәбиәт

**ДИЕ́З** *м*; *муз.* диез (*музыкаль тауыштың ярты тоны*)

**ДИЕ́ТА** *ж* диета, дөрөҫ туҡланыу; **соблюда́ть дие́ту** диета тотоу

**ДИЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое диетик, диета ...ы, еңел; **диети́ческая столо́вая** диетик ашхана; **диети́ческая пи́ща** еңел аҙыҡ

**ДИЕТО́ЛОГ** *м* диетолог, дөрөҫ туҡланыу белгесе

**ДИЗА́ЙН** *м* дизайн (**1.** *сәнәғәттә сығарылған әйберҙәрҙең художестволы проектланыуы* **2.** *дизайн тураһындағы сәнәғәт белеге һәм фән*)

**ДИЗА́ЙНЕР** *м* дизайнер (*сәнәғәт сығара торған әйберҙәрҙең нәфис эшләнешен тәьмин итеүсе рәссам-конструктор*)

**ДИ́ЗЕЛЬ** *м* дизель

**ДИ́ЗЕЛЬ-ЭЛЕКТРОХО́Д** *м* дизель-электроход

**ДИЗЕНТЕРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое дизентерия …ы; **дизентери́йные па́лочки** дизентерия таяҡсалары (*микробтары*)

**ДИЗЕНТЕРИ́Я** *ж* дизентерия (*йоғошло ҡаты эс китеү ауырыуы*)

**ДИКА́РКА** *ж см.* **дика́рь** 1, 2

**ДИКА́РЬ** *м* **1.** вәхши, ҡырағай **2.** *разг.* (*нелюдимый, застенчивый*) ҡырыҫ, ҡырағай (бик оялсан) кеше **3.** *разг.* путёвкаһыҙ курортҡа барған кеше

**ДИ́КИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡырағай, ҡыр; **ди́кие живо́тные** ҡырағай хайуандар (йәнлектәр) **2.** ҡыр …ы; **ди́кие гу́си** ҡыр ҡаҙҙары; **ди́кий лук** йыуа **3.** вәхши, ҡырағай; **ди́кие племена́** вәхши ҡәбиләләр **4.** аулаҡ, тын, кеше аяғы баҫмаған; **ди́кая приро́да** кеше аяғы баҫмаған тәбиғәт **5.** *перен.* тупаҫ, ҡырағай; **ди́кие нра́вы** ҡырағай ғәҙәттәр **6.** *перен.* сәйер, аҡылға һыймаған; **ди́кая мысль** аҡылға һыймаған фекер **7.** *перен.*, *разг.* ҡырыҫ, ҡырағай; **ди́кий ребёнок** ҡырыҫ бала **8.** *разг.* иҫ киткес; **ди́кий восто́рг** иҫ киткес шатлыҡ ♦ **ди́кий ка́мень** бик ҡаты (*күбеһенсә, һоро төҫтәге*) тау тоҡомо; **ди́кое мя́со** яман ит (*төҙәлеп килгән яраның туҡымаларында барлыҡҡа килгән шеш*)

**ДИКОБРА́З** *м* дикобраз (*арҡаһы, ҡабырғаһы оҙон, ҡаты энәләр менән ҡапланған кимереүсе хайуан*)

**ДИКО́ВИНА** и **ДИКО́ВИНКА** *ж*; *разг.* ғәжәп сәйер нәмә (йән эйәһе), ят нәмә, хәл-күренеш; **э́то что за дико́вина!** был ниндәй сәйер нәмә! ♦ **(не) в дико́вину** иҫ киткес нәмә (түгел), иҫ киткес яңылыҡ (түгел)

**ДИКО́ВИННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ғәжәп, сәйер, иҫ киткес; **дико́винные ры́бы** ғәжәйеп балыҡтар; **дико́винный слу́чай** иҫ киткес (сәйер) ваҡиға

**ДИКОРАСТУ́ЩИЙ,** -ая, -ее ҡыр …ы, ҡырҙа үҫкән, ҡырағай; **дикорасту́щие лека́рственные тра́вы** ҡырағай дарыу үләндәре

**ДИ́КОСТЬ** *ж* **1.** ҡырағайлыҡ, вәхшилек, варварлыҡ **2.** *перен.* (*грубость, необузданность*) сикһеҙ тупаҫлыҡ, тотанаҡһыҙлыҡ, дыуамаллыҡ, ҡырағайлыҡ **3.** *перен.* (*застенчивость*) ҡырыҫлыҡ, оялсанлыҡ, тартыныусанлыҡ

**ДИКТА́НТ** *м* диктант; **контро́льный дикта́нт** контроль диктант; **писа́ть дикта́нт** диктант яҙыу

**ДИКТА́Т** *м* диктат (*көслө илдең көсһөҙөрәк илгә үҙенең талаптарын тағыуы*)

**ДИКТА́ТОР** *м* диктатор (*идара итеүҙә сикһеҙ власть ҡулланыусы*)

**ДИКТА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое диктаторлыҡ …ы, диктатор …ы; **дикта́торская власть** диктаторлыҡ власы

**ДИКТА́ТОРСТВО** *с* диктаторлыҡ

**ДИКТА́ТОРСТВОВАТЬ** *несов.* диктаторлыҡ итеү

**ДИКТАТУ́РА** *ж* диктатура (*көскә таянған, бер ни менән дә сикләнмәй өҫтөнлөк итеүсе власть*); **вое́нная диктату́ра** хәрби диктатура ♦ **диктату́ра пролетариа́та** пролетариат диктатураһы

**ДИКТОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** әйтеп (уҡып) яҙҙырыу, әйтеп тороу; **диктова́ть текст** тексты уҡып яҙҙырыу **2.** үтәргә мәжбүр итеү, көсләп тағыу, ҡушыу; **диктова́ть усло́вия** шарттарҙы көсләп тағыу; **диктова́ть свою́ во́лю** үҙ ихтыярыңды көсләп тағыу

**ДИКТОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **диктова́ть**

**ДИКТО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **диктова́ть** 1; **2.** *разг.* (*диктант*) әйтеп яҙҙырыу ♦ **под дикто́вку** *чью* *кемдеңдер* ҡушыуы буйынса, мәжбүри рәүештә

**ДИ́КТОР** *м* диктор; **ди́ктор телеви́дения** телевидение дикторы

**ДИКТОФО́Н** *м* диктофон (*һөйләү телмәрен яҙа торған аппарат*)

**ДИКТОФО́ННЫЙ,** -ая, -ое диктофон …ы; **диктофо́нная за́пись** диктофон яҙмаһы

**ДИ́КЦИЯ** *ж* дикция, әйтелеш, әйтелеү рәүеше; **его́ ди́кция чёткая** уның дикцияһы бик асыҡ

**ДИЛЕ́ММА** *ж* дилемма (**1.** *лог. бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ике фекерҙе эсенә алған һәм өсөнсөһөнөң булыуына мөмкинлек ҡалдырмаған полемик дәлил* **2.** *ҡапма-ҡаршы ике хәлдең береһен генә һайлап алыу ҡыйынлығы*)

**ДИЛЕТА́НТ** *м* и **ДИЛЕТА́НТКА** *ж* дилетант (*махсус әҙерлеге булмаған, системалы белемһеҙ көйө фән йәки сәнғәт менән шөғөлләнеүсе*)

**ДИЛЕТАНТИ́ЗМ** *м* и **ДИЛЕТА́НТСТВО** *с* дилетантлыҡ (*берәй нәмәгә, хәлгә дилетанттарса ҡараш*)

**ДИЛЕТА́НТСКИЙ,** -ая, -ое дилетант …ы, дилетанттарса; **дилета́нтские сужде́ния** дилетанттарса фекерләү (фекер йөрөтөү)

**ДИЛИЖА́НС** *м*; *уст.* дилижанс (*пассажирҙар һәм почта йөрөтә торған ҙур, ябыулы арба*)

**ДИЛО́ГИЯ** *ж*; *лит.* дилогия (*бер авторҙың уртаҡ сюжетлы ике китаптан торған әҫәре*)

**ДИ́НА** *ж*; *физ.* дина (*механикала көс үлсәү берәмеге*)

**ДИНАМИ́ЗМ** *м* динамизм (*хәрәкәттең көсө, һығылмалығы*)

**ДИНА́МИК** *м* динамик (**1.** *көслө электрик репродуктор* **2.** *һөйл. өй радиоалғысы*)

**ДИНА́МИКА** *ж* **1.** динамика (*механиканың есемдәр хәрәкәте ҡанундарын өйрәнеүсе бүлеге* **2.** динамика, үҫеш (*берәй күренештең үҫеүе, үҙгәреүе, хәрәкәте*); **дина́мика истори́ческих собы́тий** тарихи ваҡиғалар үҫеше **3.** *перен.* үҫеш көсө, һығылмалылығы; **дина́мика сюже́та рома́на** роман сюжеты үҫешенең һығылмалылығы

**ДИНАМИ́Т** *м* динамит (*шартлатҡыс матдә*)

**ДИНАМИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое динамит ...ы; **динами́тный склад** динамит склады

**ДИНАМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** динамика ...ы, динамик; **динами́ческая тео́рия** динамика теорияһы; **динами́ческая геоло́гия** динамик геология **2.** *см.* **динами́чный**

**ДИНАМИ́ЧНОСТЬ** *ж* хәрәкәтсәнлек, ҡыҙыулыҡ, киҫкенлек; **динами́чность диало́га** әңгәмәнең ҡыҙыулығы

**ДИНАМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое хәрәкәтсел, хәрәкәтсән, хәрәкәттең ҡырҡыулығы (киҫкенлеге), киҫкен (ҡырҡыу) хәрәкәтле; **динами́чный та́нец** ҡырҡыу хәрәкәтле бейеү

**ДИНА́МО** *с нескл.*; *уст.* динамо (*электр тоғы эшләп сығара торған двигатель, генератор*)

**ДИНА́Р** *м* динар (*Кувейт, Ирак, Тунис һ.б. илдәрҙәге аҡса берәмеге*)

**ДИНА́СТИЯ** *ж* **1.** династия (*бер үк нәҫелдән килгән батшалар*); **дина́стия Рома́новых** Романовтар династияһы **2.** *перен.* династия, нәҫел; **дина́стия до́менщиков** домнала эшләүселәр династияһы

**ДИ́НГО** *м нескл.* динго (*Австралияла йәшәүсе ҡырағай эт*)

**ДИНОЗА́ВР** *м* динозавр

**ДИН(Ь)-ДИ́Н(Ь), ДИН(Ь)-ДО́Н, ДИНЬ-БО́М** *межд.* сең-сең, сың-сың (*ҡыңғырау һ.б. тауышы*)

**ДИО́Д** *м*; *физ.* диод

**ДИОПТРИ́Я** и **ДИО́ПТРИЯ** *ж*; *опт.* диоптрия (*линзаның оптик көсөн үлсәү берәмеге*)

**ДИОРА́МА** *ж* диорама (**1.** *үтә күренмәле туҡыманың йәки тоноҡ быяланың ике яғына ла төшөрөлгән картина* **2.** *алғы планына күләмле нәмәләр ҡуйып яһалған ҙур ярым түңәрәк картина*); **диора́ма Севасто́польской би́твы** Севастополь һуғышы диорамаһы

**ДИПКО́РПУС** *м* (*дипломатический корпус*) дипломаттар корпусы

**ДИПКУРЬЕ́Р** *м* (*дипломатический курьер*) дипломатик курьер; **рабо́тать дипкурье́ром** дипломатик курьер булып эшләү

**ДИПЛО́М** *м*; *в разн. знач.* диплом; **дипло́м кандида́та нау́к** фән кандидаты дипломы; **дипло́м лауреа́та ко́нкурса** конкурс лауреаты дипломы; **защища́ть дипло́м** диплом яҡлау

**ДИПЛОМА́НТ** *м* и **ДИПЛОМА́НТКА** *ж* дипломант; **диплома́нт фестива́ля пе́сни** йыр фестивале дипломанты

**ДИПЛОМА́Т** *м* **1.** дипломат, илсе; **рабо́тать диплома́том** илсе булып эшләү **2.** *разг.* дипломат (*оҫта эш итеүсе*); **он хоро́ший диплома́т** ул яҡшы дипломат

**ДИПЛОМА́ТИКА** *ж*; *ист.* дипломатика (*тарих фәнендә акттарҙың формаһын һәм йөкмәткеһен өйрәнә торған ярҙамсы дисциплина*)

**ДИПЛОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** дипломатик, дипломаттар ...ы, илселек ...ы; **дипломати́ческие перегово́ры** дипломатик һөйләшеүҙәр; **дипломати́ческий ко́рпус** дипломаттар корпусы; **дипломати́ческое представи́тельство** илселек вәкәләтлеге **2.** *перен.* аҡыллы, оҫта, үҙ-ара килешеп; **дипломати́ческое реше́ние вопро́са** мәсьәләне үҙ-ара килешеп хәл итеү

**ДИПЛОМАТИ́ЧНОСТЬ** *ж* дипломаттарса оҫталыҡ; **дипломати́чность разгово́ра** дипломаттарса һөйләшеү оҫталығы

**ДИПЛОМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **дипломати́ческий** 2

**ДИПЛОМА́ТИЯ** *ж* **1.** дипломатия (*хөкүмәттәрҙең халыҡ-ара сәйәсәт өлкәһендәге эшмәкәрлеге*) **2.** *разг.* дипломатия, оҫталыҡ, сослоҡ (*мөнәсәбәттәрҙә*)

**ДИПЛОМИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое дипломлы, дипломы булған; **дипломи́рованный инжене́р** дипломлы инженер

**ДИПЛО́МНИК** *м* и **ДИПЛО́МНИЦА** *ж* дипломсы, диплом яҙыусы (эшләүсе)

**ДИПЛО́МНЫЙ,** -ая, -ое диплом ...ы; **дипло́мный прое́кт** диплом проекты; **дипло́мная рабо́та** диплом эше

**ДИРЕКТИ́ВА** *ж* директива, күрһәтмә; **директи́вы съе́зда** съезд директивалары

**ДИРЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** директив, йүнәлтеүсе; **директи́вные указа́ния** директив күрһәтмәләр; **директи́вный план** директив план **2.** *перен.* ҡәтғи; **директи́вный тон** ҡәтғи тон

**ДИРЕ́КТОР** *м* директор; **дире́ктор заво́да** завод директоры

**ДИРЕКТРИ́СА** *ж*; *разг.* директриса, директор ҡатын-ҡыҙ

**ДИРЕКТОРА́Т** *м* директорат (*ҙур ойошмаларҙа баш директор етәкселегендә эш итеүсе директорҙар ҡоро*)

**ДИРЕ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое директор ...ы, директорлыҡ; **дире́кторский кабине́т** директор кабинеты

**ДИРЕ́КТОРСТВО** *с*; *разг.* директорлыҡ; **вре́мя его́ дире́кторства** уның директорлыҡ осоро

**ДИРЕ́КТОРСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг.* директорлыҡ итеү, директор булып эшләү

**ДИРЕ́КЦИЯ** *ж* дирекция; **дире́кция институ́та** институт дирекцияһы; **распоряже́ние дире́кции** дирекция әмере

**ДИРИЖА́БЛЬ** *м* дирижабль; **лета́ть на дирижа́бле** дирижаблдә осоу

**ДИРИЖЁР** *м*; *муз.* дирижёр; **дирижёр орке́стра** оркестр дирижёры

**ДИРИЖЁРСКИЙ,** -ая, -ое дирижёр ...ы, дирижёрлыҡ; **дирижёрская па́лочка** дирижёр таяғы; **дирижёрский пульт** дирижёр пульты

**ДИРИЖИ́РОВАНИЕ** *с* дирижёрлыҡ итеү; **дирижи́рование орке́стром** оркестр менән дирижёрлыҡ итеү

**ДИРИЖИ́РОВАТЬ** *несов. чем* и *без доп.* дирижёрлыҡ итеү; **дирижи́ровать хо́ром** хор менән дирижёрлыҡ итеү

**ДИРХЕ́М** *м* дирһәм (*Марокко аҡса берәмеге*)

**ДИСГАРМОНИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *муз.* аһәңһеҙ (гармонияһыҙ) булыу, гармонияһыҙ яңғырау **2.** *перен.* килешмәү, ярашмау, бармау

**ДИСГАРМОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *муз.* дисгармоник, көйһөҙ, гармонияһыҙ, яңғырашһыҙ, аһәңһеҙ; **дисгармони́ческая му́зыка** аһәңһеҙ музыка

**ДИСГАРМО́НИЯ** *ж* **1.** *муз.* дисгармония, гармония боҙолоу, гармонияһыҙлыҡ, аһәңһеҙлек **2.** *перен.* килешмәү, ярашмау, тап килмәү; **дисгармо́ния в сочета́ниях цвето́в** төҫтәрҙең үҙ-ара тап килмәүе

**ДИСК** *м* **1.** (*круглая деталь*) диск, тәрилкә **2.** *спорт.* диск; **мета́ние ди́ска** диск ырғытыу **3.** *воен.* диск; **диск автома́та** автомат дискыһы **4.** *астр.* түңәрәк, йөҙ; **диск Луны́** Ай йөҙө

**ДИ́СКАНТ** и *уст.* **ДИСКА́НТ** *м*; *муз.* дискант (**1.** *балаларға хас сағыу тауыш* **2.** *шундай тауыш менән йырлаусы*)

**ДИСКАНТО́ВЫЙ,** -ая, -ое дискант; **дисканто́вая па́ртия** дискант партия

**ДИСКВАЛИФИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** дисквалификация, квалификацияһын юғалтыу (мәхрүм итеү); **дисквалифика́ция врача́** врачты квалификацияһыҙлау **2.** *спорт.* квалификацияһынан мәхрүм итеү

**ДИСКВАЛИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* квалификацияһыҙлау, квалификацияһынан мәхрүм итеү; **дисквалифици́ровать юри́ста** юристы квалификацияһыҙлау

**ДИСКВАЛИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* квалификацияһыҙланыу, квалификацияһын юғалтыу **2.** *несов. страд. от* **дисквалифици́ровать**

**ДИСКОБО́Л** *м*; *спорт.* диск ырғытыусы

**ДИ́СКОВЫЙ,** -ая, -ое дискылы, тәрилкәле; **ди́сковая борона́** дискылы тырма; **ди́сковый автома́т** дискылы автомат

**ДИСКОТЕ́КА** *ж* дискотека (**1.** *еңел музыка әҫәрҙәренән торған грампластинкалар йыйынтығы* **2.** *шул музыканы тыңлау өсөн йәштәр клубы*); **ходи́ть на дискоте́ку** дискотекаға йөрөү

**ДИСКРЕДИТА́ЦИЯ** *ж* абруй төшөү, дәрәжәһе кәмеү, абруйына тап төшөү; **дискредита́ция иде́и** идеяның абруйы төшөү

**ДИСКРЕДИТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* абруйын төшөрөү, дәрәжәһенә (абруйына) тап төшөрөү; **дискредити́ровать прави́тельство** хөкүмәттең абруйын төшөрөү

**ДИСКРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое дискрет (*өҙөк-өҙөк, эҙлекле булмаған*); **дискре́тные элеме́нты** дискрет элементтар; **дискре́тная величина́** *мат.* дискрет дәүмәл

**ДИСКРИМИНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дискриминацион; **дискриминацио́нная поли́тика** дискриминацион сәйәсәт

**ДИСКРИМИНА́ЦИЯ** *ж* дискриминация (*хоҡуҡтарҙы ҡыҫыу; сикләп, тигеҙ хоҡуҡ бирмәү*); **ра́совая дискримина́ция** раса дискриминацияһы

**ДИСКРИМИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* тигеҙ хоҡуҡ бирмәү, хоҡуҡтарҙы ҡыҫыу (сикләү)

**ДИСКРИМИНИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **дискримини́ровать**

**ДИСКУССИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дискуссион, бәхәсле, дискуссия ...ы, бәхәс ...ы; **дискуссио́нный клуб** дискуссия клубы

**ДИСКУССИ́РОВАТЬ** *несов. см.* **дискути́ровать**

**ДИСКУ́ССИЯ** *ж* дискуссия, бәхәс, һүҙ көрәштереү; **нау́чная диску́ссия** ғилми бәхәс; **уча́ствовать в диску́ссии** бәхәстә ҡатнашыу

**ДИСКУТИ́РОВАТЬ** и **ДИСКУССИ́РОВАТЬ** *несов. что, о чём* бәхәсләшеү, һүҙ көрәштереү

**ДИСЛОКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дислокация ...ы, дислокацион; **дислокацио́нный план** дислокация планы

**ДИСЛОКА́ЦИЯ** *ж* **1.** *воен.* дислокация, урынлашыу, урын алыу **2.** *мед.* урынынан күсеү (тайыу, сығыу) (*берәй ағзаның, һөйәктең*) **3.** *геол.* үҙ урынынан күсеү (шыуыу)

**ДИСЛОЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что; воен.* урынлаштырыу

**ДИСПАНСЕ́Р** *м* диспансер; **туберкулёзный диспансе́р** туберкулёз диспансеры

**ДИСПАНСЕРИЗА́ЦИЯ** *ж* диспансеризация, диспансерлаштырыу (*диспансерҙар аша һаулыҡ һаҡлау саралары үткәрең системаһы*)

**ДИСПАНСЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое диспансер ...ы; **диспансе́рное наблюде́ние** диспансер күҙәтеүе; **диспансе́рный ме́тод** диспансер ысулы

**ДИСПЕПСИ́Я** *ж*; *мед.* диспепсия, ашҡаҙан эшләмәү (*ашҡаҙандың, эсәктәрҙең функцияһы боҙолоу*)

**ДИСПЕРСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* дисперсион, дисперсия ...ы; **дисперсио́нный ана́лиз** дисперсион анализ ♦ **дисперсио́нная среда́** дисперсия мөхите (*яҡтылыҡтың призма аша үткәндә айырым спектр төҫтәренә тарҡалыуы*)

**ДИСПЕ́РСИЯ** *ж*; *спец.* дисперсия; **диспе́рсия минера́льных соле́й в по́чве** тупраҡтағы минераль тоҙҙарҙың тарҡалыуы

**ДИСПЕ́РСНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* онталған, онтаҡ хәлгә килгән ♦ **диспе́рсная фа́за** *спец.* дисперсион (дисперслы) фаза (*бер төрлө ҡаты матдәнең, шыйыҡлыҡтың йәки газдың бик нык ваҡланып, тирә-йүн мөхиткә бер тигеҙ таралыуы*)

**ДИСПЕ́ТЧЕР** *м* диспетчер (*транспорт хәрәкәте, айырым предприятиелар эше менән үҙәк пункттан идара итеүсе*); **станцио́нный диспе́тчер** станция диспетчеры

**ДИСПЕТЧЕРИЗА́ЦИЯ** *ж* диспетчерлаштырыу, үҙәкләштереү (*етештереүгә һ.б. эшмәкәрлеккә контроль, идара итеү*)

**ДИСПЕ́ТЧЕРСКИЙ,** -ая, -ое диспетчер ...ы, диспетчерлыҡ ...ы; **диспе́тчерская слу́жба** диспетчер хеҙмәте; **диспе́тчерский пункт** диспетчер пункты

**ДИСПОЗИ́ЦИЯ** *ж*; *воен.* диспозиция (**1.** *караптарҙың якорға торғандағы урынлашыу тәртибе* **2.** *ғәскәрҙәрҙе, флотты һуғыш ҡырында туҡтаған, торған ерендә урынлаштырыу тәртибе*); **диспози́ция полково́й артилле́рии** полк артиллерияһының диспозицияһы

**ДИСПРОПОРЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* пропорцияһыҙлыҡ, ярашмаусанлыҡ

**ДИСПРОПОРЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое диспропорциональ, диспропорция ...ы, пропорцияһыҙ; **диспропорциона́льное расположе́ние домо́в** өйҙәрҙең пропорцияһыҙ урынлашыуы

**ДИСПРОПО́РЦИЯ** *ж* пропорцияһыҙлыҡ, ярашмаусанлыҡ; **диспропо́рция в разви́тии наро́дного хозя́йства** халыҡ хужалығы үҫешендәге пропорцияһыҙлыҡ

**ДИ́СПУТ** *м* диспут, бәхәс; **литерату́рный ди́спут** әҙәби диспут

**ДИСПУТИ́РОВАТЬ** *несов.*; *уст.* диспутта ҡатнашыу, бәхәскә инеү

**ДИССЕРТА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое диссертацияға яраҡлы, диссертация яҙырлыҡ; **диссерта́бельная те́ма** диссертацияға яраҡлы тема

**ДИССЕРТА́НТ** *м* и **ДИССЕРТА́НТКА** *ж* диссертант, диссертация яҙыусы (яҡлаусы)

**ДИССЕРТА́ЦИЯ** *ж* диссертация; **кандида́тская диссерта́ция** кандидатлыҡ диссертацияһы; **защити́ть диссерта́цию** диссертация яҡлау

**ДИССИДЕ́НТ** *м* **1.** *уст.* (*тот, кто отступает от господствующего в стране вероисповедания*) мөртәт, динде ташлаусы, диндән ситләшеүсе **2.** (*инакомыслящий*) диссидент (*илдә йәмғиәттә хөкөм һөргән идеология менән риза булмаған кеше*)

**ДИССИМИЛЯТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* диссимилятив (*яңғырау өндөң һаңғыраулашҡан варианты*); **диссимиляти́вный проце́сс** диссимилятив процесс

**ДИССИМИЛЯ́ЦИЯ** *ж* **1.** *лингв.* диссимиляция, ойошмаусылыҡ (*йәнәшә торған ике тартынҡының бер-береһенә тәьҫир итмәүе*) **2.** *биол.* тарҡалыу (*ҡатмарлы органик матдәләрҙең организмда ұҙләштерелеп тарҡалыуы*)

**ДИССОНА́НС** *м* **1.** *муз.* диссонанс, гармонияһыҙлыҡ, аһәңһеҙлек **2.** *перен.* килешмәү, ярашмау, тура килмәү

**ДИССОНИ́РОВАТЬ** *несов.*; *муз.* аһәңһеҙ яңғырау, гармонияһыҙ яңғырау

**ДИСТАНЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое дистанцион, дистанция ...ы, алыҫтан; **дистанцио́нная тру́бка** дистанцион торба (*снарядтың шартлау алыҫлығын билдәләүсе*); **дистанцио́нный нача́льник** дистанция башлығы

**ДИСТА́НЦИЯ** *ж* **1.** дистанция, ара, аралыҡ, алыҫлыҡ; **бег на коро́ткую диста́нцию** ҡыҫҡа араға йүгереү **2.** (*участок на ж.д.*) дистанция; **нача́льник диста́нции** дистанция башлығы ♦ **сойти́ с диста́нции** *спорт.* ярыштан сығыу

**ДИСТИЛЛИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое дистиллирланған, дистилляцияланған, ҡыуып таҙартылған; **дистиллиро́ванная вода́** дистиллирланған һыу

**ДИСТИЛЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* дистиллирлау, дистилляция яһау, ҡыуып таҙартыу, сафландырыу; **дистилли́ровать во́ду** һыуҙы дистиллирлау

**ДИСТИЛЛЯ́Т** *м* дистиллят (*ҡыуып таҙартылған шыйыҡлыҡ*); **бензи́н, кероси́н — дистилля́ты не́фти** бензин, кәрәсин — нефть дистилляттары

**ДИСТИЛЛЯ́ТОР** *м* дистиллятор, ҡыуыу аппараты

**ДИСТИЛЛЯ́ЦИЯ** *ж см.* **дистилли́ровать**

**ДИСТРО́ФИК** *м*; *разг.* дистрофик, дистрофия менән ауырыусы

**ДИСТРОФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дистрофик; **дистрофи́ческое состоя́ние** дистрофик хәл

**ДИСТРОФИ́Я** *ж* дистрофия (*ағзалар һәм туҡымалар туҡланыуының боҙолоуы*); **дистрофи́я серде́чной мы́шцы** йөрәк ите(нең) дистрофияһы

**ДИСЦИПЛИ́НА I** *ж* дисциплина, тәртип; **во́инская дисципли́на** хәрби дисциплина; **дисципли́на в шко́ле** мәктәптәге тәртип; **соблюда́ть дисципли́ну** тәртип һаҡлау

**ДИСЦИПЛИ́НА II** *ж* дисциплина, фән, уҡыу (өйрәнеү) фәне; **истори́ческие дисципли́ны** тарих фәндәре

**ДИСЦИПЛИНА́РНЫЙ,** -ая, -ое дисциплина ...ы, дисциплинар; **дисциплина́рный уста́в** дисциплинар устав; **дисциплина́рное взыска́ние** дисциплинар яза ♦ **дисциплина́рная ро́та (часть)** дисциплинар рота (часть)

**ДИСЦИПЛИНИ́РОВАННОСТЬ** *ж* тәртипле булыу; **дисциплини́рованность ученико́в** уҡыусыларҙың тәртипле булыуы

**ДИСЦИПЛИНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое тәртипле, дисциплиналы; **дисциплини́рованный слу́жащий** тәртипле хеҙмәткәр; **дисциплини́рованный класс** тәртипле синыф

**ДИСЦИПЛИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. когочто* тәртипкә өйрәтеү (күнектереү); **дисциплини́ровать солда́т** һалдаттарҙы тәртипкә күнектереү

**ДИСЦИПЛИНИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов.* тәртипкә өйрәнеү (күнегеү)

**ДИТЯ́** *с* бала ♦ **дитя́ приро́ды** тәбиғәт балаһы (*тәбиғәткә яҡын, тәбиғәт ҡосағында үҫкән кеше, халыҡ*)

**ДИФИРА́МБ** *м* дифирамб (**1.** *Боронғо Грецияла Дионис аллаһы хөрмәтенә маҡтау хоры* **2.** *иҫ китеп, үтә маҡтау*) ♦ **петь дифира́мбы** *кому-чему* күккә күтәреү, үтә маҡтау

**ДИФИРАМБИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дифирамбик, маҡтау ...ы; **дифирамби́ческие стихи́** дифирамбик шиғырҙар, маҡтау шиғырҙары

**ДИФТЕРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое дифтерия ...ы; **дифтери́йные па́лочки** дифтерия таяҡсалары

**ДИФТЕРИ́Т** *м*; *разг. см.* **дифтери́я**

**ДИФТЕРИ́Я** *ж*; *мед.* дифтерия (*күберәк балаларҙа булған йоғошло тамаҡ ауырыуы*)

**ДИФТО́НГ** *м*; *лингв.* дифтонг (*ҡуш һуҙынҡы өн*)

**ДИФТОНГИЗА́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* дифтонгылашыу, дифтонгыға әйләнеү

**ДИФТОНГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дифтонгик; **дифтонги́ческие сочета́ния зву́ков** өндәрҙең дифтонгик ҡушылмалары

**ДИФФЕРЕНЦИА́Л** *м*; *мат.*, *тех.* дифференциал; **дифференциа́л автомоби́ля** автомобиль дифференциалы

**ДИФФЕРЕНЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *мат.* дифференциаль; **дифференциа́льное уравне́ние** дифференциаль тигеҙләмә **2.** *перен.* төрлө, дифференциаль; **дифференциа́льная ре́нта** дифференциаль рента

**ДИФФЕРЕНЦИА́ЦИЯ** *ж* дифференциация, бүлеү, айырыу, бүленеү, айырылыу

**ДИФФЕРЕНЦИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* **1.** *кого-что* (*разграничить*) айырыу, бүлеү, ваҡлау, тарҡатыу, дифференциация яһау **2.** *что*; *мат.* дифференциал табыу

**ДИФФЕРЕНЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* дифференцияланыу, айырылыу, бүленеү, төрлө элементтарға тарҡалыу **2.** *несов. страд. от* **дифференци́ровать**

**ДИФФУЗИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *физ.* диффузия ...ы; **диффузио́нный проце́сс** диффузия процесы

**ДИФФУ́ЗИЯ** *ж*; *физ.* диффузия, аралашыу, ҡатнашыу; **диффу́зия га́зов** газдар диффузияһы

**ДИФФУ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* диффузия ...ы, аралашҡан, ҡушылған, ҡатнашҡан, һүреңке, шыйыҡ; **диффу́зный свет** һүреңке (тоноҡ) яҡтылыҡ

**ДИЧА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡырағайланыу, ҡырағай хәлгә килеү; **сад дича́ет** баҡса ҡырағайлана бара **2.** ҡырыҫланыу, (кешенән) тартыныу, ситләшеү

**ДИЧИ́ТЬСЯ** *несов. кого-чего* и *без доп.*; *разг.* тартыныу, ситләшеү, ҡасыу; **дичи́ться посторо́нних** сит кешеләрҙән тартыныу

**ДИЧО́К** *м* **1.** ашланмаған йәки ҡырағай емеш ағасы; **я́блоня-дичо́к** ҡырағай алмағас **2.** ашлау өсөн үҫтерелгән сәсмәлеҡ; **дичо́к ви́шни** сейә сәсмәлеге; **приви́ть дичо́к** сәсмәлек менән ашлау; **3.** *перен.*, *разг.* ҡырыҫ, оялсан, тартыныусан (*бала, кеше*)

**ДИЧЬ** *ж* **1.** *собир.* кейек, ҡырағай йәнлек (*ҡош*); **водопла́вающая дичь** ҡырағай һыу ҡоштары; **охо́та на дичь** ҡыр йәнлегенә һунар **2.** *перен.* кешеһеҙ (ҡараңғы) урын; **дичь глуха́я** кешеһеҙ ҡараңғы урын **3.** *разг.* юҡ-бар, юҡ (буш) һүҙ; **нести́ дичь** юҡ һүҙ һөйләү

**ДЛИНА́** *ж* оҙонлоҡ, буй; **длина́ шеста́** ҡолға оҙонлоғо; **прыжки́ в длину́** оҙонлоҡҡа һикереү

**ДЛИННЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* оҙайыу; **дни к весне́ длинне́ют** яҙғылыҡҡа көндәр оҙоная

**ДЛИННОВО́ЛНОВЫЙ** и **ДЛИННОВОЛНО́ВЫЙ,** -ая, -ое оҙон тулҡынлы; **длинново́лновый приёмник** оҙон тулҡынлы радиоалғыс

**ДЛИННОВОЛОКНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое оҙон сүсле; **длинноволокни́стый лён** оҙон сүсле етен

**ДЛИННОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое оҙон сәсле; **длинноволо́сая де́вушка** оҙон сәсле ҡыҙ

**ДЛИННОКРЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое оҙон ҡанатлы; **длиннокры́лые ла́сточки** оҙон ҡанатлы ҡарлуғастар

**ДЛИННОНО́ГИЙ,** -ая, -ое оҙон аяҡлы (сираҡлы)

**ДЛИННОНО́СЫЙ,** -ая, -ое оҙон морон, оҙон моронло (танаулы, томшоҡло)

**ДЛИННОПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое оҙон итәкле, оҙон сабыулы (*кейем*)

**ДЛИННОРУ́КИЙ,** -ая, -ое оҙон ҡуллы

**ДЛИННО́ТЫ** *мн.* артыҡ оҙон, күп һүҙлелек (*әҙәби әҫәрҙә*); **в расска́зе мно́го длинно́т** хикәйәгә күп һүҙлелек хас

**ДЛИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҙон; **дли́нное пла́тье** оҙон күлдәк; **дли́нные во́лосы** оҙон сәс **2.** оҙаҡ, алыҫ; **дли́нное путеше́ствие** оҙаҡ сәйәхәт ♦ **дли́нная пе́сня** һөйләүе оҙаҡ, оҙон; **дли́нный рубль** *прост.* оҙон (күп) аҡса (*еңел табылған мал*); **дли́нный язы́к** *у кого* теле оҙон (*күп һәм артығын һөйләгән кеше тураһында*)

**ДЛИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* оҙайлыҡ, оҙонлоҡ, оҙайлы (оҙон) булыу; **дли́тельность о́тпуска** ялдың оҙайлы булыуы

**ДЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое оҙон, оҙаҡ, оҙайлы, дауамлы, оҙаҡҡа һуҙылған; **дли́тельная командиро́вка** оҙайлы командировка; **дли́тельное молча́ние** оҙаҡ өнһөҙ булыу, оҙаҡ өндәшмәү

**ДЛИ́ТЬСЯ** *несов.* һуҙылыу (оҙаҡҡа барыу), дауам итеү; **собра́ние дли́лось допоздна́** йыйылыш бик һуңға хәтле дауам итте

**ДЛЯ** *предлог с род. п.* **1.** (*при обозначении лица, предмета, в пользу, в интересах которого что-л. совершается*) өсөн, өсөн тип; **всё для бла́га наро́да** барыһы ла халыҡ мәнфәғәте өсөн; **стара́ться для де́ла** эш өсөн тырышыу

**2.** (*при указании на цель действия*) өсөн, өсөн тип, -ға/-гә, маҡсаты (теләге, уйы) менән; **для чего́ вы́звали?** ни өсөн саҡырҙығыҙ?

**3.** (*при обозначении лица, предмета, по отношению к которому характеризуется что-л.*) өсөн, -ға/-гә; **для нас до́брого вре́мя** беҙгә ваҡыт ҡиммәт; **для него́ всё равно́** уның өсөн барыбер

**4.** (*при указании на назначение предмета*) -ыу/-еү ...ы; **кни́га для чте́ния** уҡыу китабы; **ме́сто для о́тдыха** ял итеү урыны

**5.** (*при указании на лицо, которому что-л. предназначается*) өсөн; **посо́бие для студе́нтов** студенттар өсөн әсбап; **това́ры для садово́дов** баҡсасылар өсөн кәрәк-яраҡ ♦ **для ви́да** күҙ буяу өсөн, исем өсөн; **не́ для чего** кәрәге юҡ, кәрәкмәй

**ДНЕВА́ЛЬНЫЙ** *м*; *воен.* дневальный (*казармала эске тәртиптең үтәлешен күҙәтеүсе дежур һалдат*)

**ДНЕВА́ТЬ** *несов.* көн үткәреү, бер көнгә туҡтау ♦ **днева́ть и ночева́ть** көнө-төнө ятыу, көнөн-төнөн шунда булыу

**ДНЁВКА** *ж* бер көнлөк ял (*походтарҙа, күсеш мәлендә*)

**ДНЕВНИ́К** *м* көндәлек, көндәлек дәфтәр; **дневни́к ученика́** уҡыусы көндәлеге

**ДНЕВНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое көндәлек ...ы; **дневнико́вые за́писи** көндәлек яҙмалары

**ДНЕВНО́Й,** -ая, -ое **1.** көндөҙгө, көн ...ы; **дневно́й свет** көн яҡтылығы; **дневно́е вре́мя** көндөҙгө ваҡыт **2.** көнлөк, бер көнлөк; **вы́полнить дневну́ю но́рму** көнлөк норманы үтәү; **дневно́й за́работок** бер көнлөк эш хаҡы ♦ **ла́мпа дневно́го све́та** көндөҙгө кеүек яҡтылыҡ биреүсе лампа

**ДНЁМ** *нареч.* көндөҙ; **вы́ехать днём** көндөҙ сығып китеү ♦ **днём с огнём не найти́** көндөҙ шәм яҡтыртып эҙләһәң дә таба алмаҫһың

**ДНИ́ЩЕ** *с* төп (*яҫы нәмәнең*); **дни́ще бо́чки** мискәнең төбө; **дни́ще доща́той ло́дки** таҡта кәмәнең төбө

**ДНО** *с* төп; **дно о́зера** күл төбө; **дно корзи́ны** кәрзин төбө ♦ **вверх дном** аҫты-өҫкә (килеү); **до дна** бөткәнсе, төбөнә тиклем; **золото́е дно** төшөмлө урын (сығанаҡ), төпһөҙ хазина; **идти́ ко дну**: 1) һыуға батыу; 2) бөлөү, уңышһыҙлыҡҡа дусар булыу; 3) кешелектән сығыу; **на дне души́** күңел түрендә; **ни дна, ни покры́шки** *кому*; *прост.* ер йоторо, дөмөккөрө; **пусти́ть на дно** батырыу, юҡ итеү

**ДНООЧИСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыу төбөн таҙарткыс (*судно*)

**ДНОУГЛУБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыу төбөн тәрәнәйткес (*машина*)

**ДО I** *предлог с род. п.* **1.** (*при указании предела, границы распространения действия*) -ға/-гә саҡлы (ҡәҙәр, тиклем); **до го́рода** ҡалаға саҡлы; **до дере́вни** ауылға тиклем

**2.** (*при указании временного предела действия*) -ғансы/-гәнсе, -ға/-гә тиклем (саҡлы, ҡәҙәр); **боро́ться до побе́дного конца́** еңеп сыҡҡансы көрәшеү; **до после́днего дыха́ния** һуңғы һулышҡа тиклем

**3.** (*при указании предшествовавшего события*) -дан/-дән элек (алда), -ға/-гә тиклем (саҡлы), -ғаса/-гәсә; **до войны́** һуғыштан элек; **до наступле́ния холодо́в** һалҡындарҙан элек, һалҡындарға саҡлы, һалҡын төшкәнгәсә

**4.** (*при обозначении предела количества, состояния*) -ға/-гә ҡәҙәр саҡлы (хәтлем), яҡын, ҡалдырмай; **моро́з доходи́л до 40 гра́дусов** һыуыҡ 40 градусҡа ҡәҙәр етте; **зал вмеща́ет до ты́сячи челове́к** залға меңгә яҡын кеше һыя; **промо́кнуть до ни́тки** лыҡа һыу булыу

**5.** (*при указании на предмет, лицо, на которые направлено действие*); **дотро́нуться до лба** маңлайға тейеү; **нам бы́ло не до него́** беҙҙә уның ҡайғыһы юҡ ине ♦ **до каки́х пор** ҡасанға тиклем, күпме; **до кра́йности** сиктән тыш, сикһеҙ; **до поры́, до вре́мени** ваҡыты еткәнсе, үҙ ваҡытында; **до свида́ния** хәҙергә (әлегә) һау булығыҙ, һау булып тороғоҙ, хушығыҙ; **до упа́ду** хәлдән тайғансы, аяҡтан йығылғансы

**ДО II** *с нескл.*; *муз.* до (*гамманың беренсе нотаһы*)

**ДО...** *приставка* **1.** *ҡылымдарға түбәндәге мәғәнәләр бирә*: а) *эш-хәрәкәттең тамамланыуы*; **дочита́ть** уҡып бөтөрөү, уҡып сығыу, тиклем уҡыу; б) *берәй нәмәне өҫтәү*; **досы́пать** өҫтәп һалыу (ҡойоу); в) *эш-хәрәкәтте билдәле һөҙөмтәгә еткереү*; **добуди́ться** көскә уятыу, уята алыу **2.** *сифатҡа "тиклемгә" мәғәнәһен өҫтәй*; **дореволюцио́нный** революцияға тиклемге **3.** *сифатҡа ҡушылып, рәүеш яһай*; **добела́** ағарғансы; **докрасна́** ҡыҙарғансы

**ДОБА́ВИТЬ** *сов. что, чего* өҫтәү, ҡушыу, арттырыу; **доба́вить к ска́занному** әйтелгәнгә өҫтәү

**ДОБА́ВИТЬСЯ** *сов.* өҫтәлеү, ҡушылыу, арттырылыу; **к нам доба́вились ещё дво́е** беҙгә тағы икәү өҫтәлде

**ДОБА́ВКА** *ж*; *разг.* өҫтәмә, өҫтәлгән нәмә; **проси́ть доба́вки** өҫтәмә һорау

**ДОБАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **доба́вить 2.** өҫтәмә; **добавле́ние к статье́** мәҡәләгә өҫтәмә

**ДОБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **доба́вить**

**ДОБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **добавля́ть**

**ДОБА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое өҫтәлмә, өҫтәмә, өҫтәп бирелгән; **доба́вочный паёк** өҫтәмә паёк; **доба́вочные расхо́ды** өҫтәмә тотоноуҙар (сығымдар)

**ДОБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **добежа́ть**

**ДОБЕ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* -сы/-се йүгереү, йүгерә торғас хәлдән тайыу; **добе́гаться до изнеможе́ния** хәлдән тайғансы йүгереү

**ДОБЕЖА́ТЬ** *сов.* йүгереп етеү, йүгереп барып (килеп) етеү

**ДОБЕЛА́** *нареч.* **1.** ағартҡансы, ап-аҡ булғансы; **отмы́ть добела́** ағартҡансы йыуыу, ап-аҡ булғансы йыуыу **2.** (*до белого каления*) ағарғансы, ап-аҡ булғансы (ҡыҙҙырыу); **раскали́ть желе́зо добела́** тимерҙе ағарғансы ҡыҙҙырыу

**ДОБЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **добели́ть**

**ДОБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* ағартып бөтөрөү (бөтөү), аҡлап бөтөү; **добели́ть сте́ны** стеналарҙы ағартып бөтөү

**ДОБИВА́ТЬ** *несов. см.* **доби́ть**

**ДОБИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **доби́ться**

**ДОБИРА́ТЬ** *несов. см.* **добра́ть**

**ДОБИРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **добра́ться**

**ДОБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* үлтереү, юҡ итеү (*үлә алмағанды*); **доби́ть ра́неного зве́ря** яраланған йыртҡысты үлтереү **2.** *что* (*перебить всё*) ватыу, онтау, онтап (ватып) бөтөрөү, онтап (ватып) ташлау; **доби́ть ча́шки** сынаяҡты ватып бөтөрөү

**ДОБИ́ТЬСЯ** *сов. чего* **1.** ирешеү, ҡаҙаныу; **доби́ться сла́вы** дан ҡаҙаныу; **доби́ться успе́хов** уңышлыҡтарға ирешеү **2.** *от кого* (*допытаться*) алыу, белеү, табыу; **доби́ться пра́вды** дөрөҫлөктө табыу; **доби́ться и́стины** хаҡлыҡты белеү ♦ **не доби́ться ни сло́ва** бер һүҙ ҙә ала алмау, бер һүҙ әйттерә алмау, һүҙгә ылыҡтыра алмау; **(не) доби́ться то́лку** рәт сығара алыу (алмау), йүне булыу (булмау)

**ДО́БЛЕСТНЫЙ,** -ая, -ое *высок.* **1.** ҡаһарман, ғәйрәтле, йөрәкле, ғәййәр, батыр; **до́блестные во́ины** ҡаһарман яугирҙар **2.** данлы, шанлы, маҡтаулы; **до́блестный труд** маҡтаулы хеҙмәт

**ДО́БЛЕСТЬ** *ж*; *высок.* **1.** батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ, ғәйрәт, ғәййәрлек, йөрәклелек **2.** данлылыҡ, шанлылыҡ, маҡтаулылыҡ; **проявля́ть до́блесть** шанлылыҡ күрһәтеү

**ДОБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **добро́сить**

**ДОБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, кого-чего* алыу, алып еткереү; **добра́ть в экспеди́цию ещё одного́ челове́ка** экспедицияға йәнә бер кешене алыу **2.** *что, чего* бөтөргәнсе йыйыу, алып (йыйып) бөтөрөү; **добра́ть я́годы** ҡалған еләкте йыйып бөтөрөү

**ДОБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *до кого-чего*; *разг.* барып (килеп, ҡайтып) етеү; **е́ле добра́ться до до́му** өйгә саҡ ҡайтып етеү **2.** *до чего*; *перен.*, *разг.* төбөнә (айышына) төшөү, төпсөнөп аңлау, табыу; **добра́ться до су́ти де́ла** эштең айышына төшөү; **добра́ться до пра́вды** хаҡлыҡты табыу **3.** *прост.* тейешеү, етешеү (*янағанда*); **я ещё доберу́сь до него́** мин уның кәрәген бирермен әле, мин уға етешермен әле

**ДОБРЕСТИ́** *сов.* көскә (саҡ) барып (килеп) етеү; **е́ле добрести́ до до́му** өйгә саҡ ҡайтып етеү

**ДОБРЕ́ТЬ I** *несов.* (*становиться добрее*) (күңеле) йомшарыу, йомартланыу, яҡшыланыу, яҡшыраҡ булыу; **душа́ у него́ добре́ла** уның күңеле йомшара барҙы

**ДОБРЕ́ТЬ II** *несов.*; *разг.* (*толстеть*) йыуанайыу, ҡалынайыу, һимереү, көрәйеү

**ДОБРО́ I** *с* **1.** яҡшылыҡ, изгелек, игелек; **жела́ть добра́** *кому-л.* изгелек теләү; **де́лать лю́дям добро́** кешегә изгелек эшләү **2.** *собир.*; *разг.* байлыҡ, мал-мөлкәт; **наро́дное добро́** халыҡ байлығы **3.** *разг.*, *ирон.* юҡ-бар, эшкинмәгән нәмә; **тако́го добра́ у сами́х полно́** ундай юҡ-бар үҙебеҙҙә тулы♦ **добро́ пожа́ловать** рәхим итегеҙ, хуш килдегеҙ; **не к добру́** яҡшыға түгел; **нет ху́да без добра́** ямандың да яҡшы яғы булыуы бар (мөмкин); **помина́ть добро́м** яҡшылыҡ менән (яҡшы һүҙ менән) иҫкә алыу; **дать добро́** *на что* рөхсәт (фатиха) биреү; **получи́ть добро́** *на что* рөхсәт (фатиха) алыу

**ДОБРО́ II** *частица*; *прост.*, *уст.* (*в значении "пусть будет так"*) ярай, яҡшы, һәйбәт; **добро́, сде́лаем по-ва́шему** ярай, һеҙҙеңсә эшләйек

**ДОБРОВО́ЛЕЦ** *м* ирекле, азат (*үҙ ирке менән армияға китеүсе йәки үҙ өҫтөнә берәй эш алыусы*)

**ДОБРОВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ирекле, үҙ ирке (теләге) менән эшләнгән, ихтыяри; **доброво́льное уча́стие** үҙ ирке менән ҡатнашыу; **на доброво́льных нача́лах** ихтыяри нигеҙҙә; **доброво́льный отка́з** үҙ ирке менән баш тартыу **2.** ирекле; **доброво́льное благотвори́тельное о́бщество** ирекле хәйриә йәмғиәте

**ДОБРОВО́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ирекле, үҙ ирке менән; **доброво́льческие отря́ды** ирекле отряд

**ДОБРОДЕ́ТЕЛЬ** *ж* изгелек, яҡшылыҡ, саф күңеллелек; **прояви́ть доброде́тель** яҡшылыҡ күрһәтеү

**ДОБРОДЕ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое изгелекле, яҡшы, эскерһеҙ; **доброде́тельный челове́к** изгелекле кеше; **доброде́тельный посту́пок** эскерһеҙ эшләнгән эш

**ДОБРОДУ́ШИЕ** *с* яҡшы (йомшаҡ, киң) күңеллелек, рәхимлелек, шәфҡәтлелек; **источа́ть доброду́шие** шәфҡәтлелек бөркөү

**ДОБРОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ (яҡшы, киң) күңелле, асыҡ, эскерһеҙ, рәхимле, шәфҡәтле; **доброду́шный челове́к** йомшаҡ күңелле кеше; **доброду́шный хара́ктер** рәхимле холоҡ

**ДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬ** *м* и **ДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* изгелекле кеше, яҡшылыҡ (изгелек) теләүсе (эшләүсе)

**ДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* изгелекле мөнәсәбәт, яҡшылыҡ теләү

**ДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое изгелекле, мәрхәмәтле, шәфҡәтле, яҡшылыҡ теләүсе; **доброжела́тельное отноше́ние** изгелекле мөнәсәбәт; **доброжела́тельный челове́к** изгелекле кеше

**ДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬСТВО** *с см.* **доброжела́тельность**

**ДОБРОКА́ЧЕСТВЕННОСТЬ** *ж* яҡшы сифат; **доброка́чественность тка́ни** туҡыманың яҡшы сифаты

**ДОБРОКА́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҡшы сифатлы; **доброка́чественные проду́кты** яҡшы сифатлы аҙыҡ-түлек **2.** *мед.* ҡурҡынысһыҙ, яман булмаған; **доброка́чественная о́пухоль** яман булмаған шеш

**ДОБРО́М** *нареч.*; *разг.* яҡшылыҡ менән, яҡшы саҡта; **добро́м прошу́** яҡшылыҡ менән үтенәм

**ДОБРОПОРЯ́ДОЧНОСТЬ** *ж* әҙәплелек, инсафлылыҡ, йүнлелек

**ДОБРОПОРЯ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, инсафлы, йүнле; **добропоря́дочный челове́к** әҙәпле кеше; **добропоря́дочная семья́** инсафлы ғаилә

**ДОБРОСА́ТЬ** *сов.* ташлап (өйөп, тултырып) бөтөрөү (өлгөрөү); **добросáть се́но на сенова́л** бесәнде бесәнлеккә тултырып бөтөрөү

**ДОБРОСЕРДЕ́ЧИЕ** *с* и **ДОБРОСЕРДЕ́ЧНОСТЬ** *ж* йомшаҡ (киң, яҡшы) күңеллелек, рәхимлелек, миһырбанлылыҡ

**ДОБРОСЕРДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ (киң, яҡшы) күңелле, рәхимле, миһырбанлы; **добросерде́чное отноше́ние** рәхимле мөнәсәбәт

**ДОБРО́СИТЬ** *сов.* *что* ташлап еткереү, еткерә ташлау; **добро́сить мяч до черты́** тупты һыҙыҡҡа еткерә ташлау; **не добро́сить грана́ту до мише́ни** гранатаны сәпкә ташлап еткермәү

**ДОБРОСО́ВЕСТНОСТЬ** *ж* выжданлылыҡ, намыҫлылыҡ, инабатлылыҡ; **добросо́вестность в рабо́те** эшкә (ҡарата) намыҫлылыҡ

**ДОБРОСО́ВЕСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** выжданлы, намыҫлы, инабатлы; **добросо́вестный рабо́тник** намыҫлы хеҙмәткәр **2.** тырыш, тырышып (намыҫ менән) эшләгән; **добросо́вестный труд** тырыш хеҙмәт

**ДОБРОСОСЕ́ДСКИЙ,** -ая, -ое яҡшы күршеләрсә, яҡшы күршеләр булараҡ, дуҫтарса; **добрососе́дские отноше́ния** яҡшы күршеләрсә мөнәсәбәт

**ДОБРОТА́** *ж* яҡшылыҡ, изгелек, киң күңеллелек; **доброта́ хара́ктера** холоҡтоң изгелеклелеге

**ДОБРО́ТНОСТЬ** *ж* (яҡшы) сифатлылыҡ, ныҡлыҡ, сыҙамлылыҡ; **добро́тность материа́ла** туҡыманың сифатлылығы

**ДОБРО́ТНЫЙ,** -ая, -ое (яҡшы) сифатлы, ныҡ, сыҙамлы, түҙемле, төтөмлө; **добро́тные семена́** яҡшы сифатлы орлоҡ; **добро́тная ткань** ныҡ тауар

**ДО́БРЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҡшы (йомшаҡ) күңелле, рәхимле, шәфҡәтле, кешелекле, мәрхәмәтле; **до́брый челове́к** мәрхәмәтле кеше **2.** яҡын, йылы; **мои́ до́брые друзья́** минең яҡын дуҫтарым; **до́брые отноше́ния** йылы мөнәсәбәт **3.** яҡшы, саф, тапһыҙ, керһеҙ; **до́брое и́мя** яҡшы исем (дан) **4.** изге, һәйбәт, яҡшы; **до́брые дела́** һәйбәт эштәр; **до́брые наме́рения** изге ниәттәр; **до́брая сла́ва** яҡшы дан; **до́брый сове́т** яҡшы кәңәш **5.** *разг.* -дан да/-дән дә кәм түгел, аҙ тигәндә, тулы; **до́брых пятьдеся́т лет** тулы илле йәш; **до́брых де́сять вёрст** аҙ тигәндә ун саҡрым ♦ **бу́дьте добры́** рәхим итеп; **в до́брый путь** аҡ юл, хәйерле юлға; **в до́брый час** хәйерле (изге) сәғәттә; **всего́ до́брого** хушығыҙ, иҫән-һау булығыҙ; **до́брый ге́ний** йән дуҫ, изге зат; **до́брый ма́лый** изгелекле кеше; **до́брый ве́чер** хәйерле кис; **до́брое у́тро** хәйерле иртә; **до́брый день** хәйерле көн; **по до́брой во́ле** үҙ теләге (ирке, ихтыяры) менән; **чего́ до́брого** *в знач. вводн. сл.* бик ихтимал, бик мөмкин

**ДОБРЯ́К** *м*; *разг.* изгелекле, йомшаҡ (киң) күңелле, мәрхәмәтле, миһырбанлы кеше

**ДОБУДИ́ТЬСЯ** *сов.* *кого*; *разг.* саҡ (көскә) уятыу

**ДОБЫВА́НИЕ** *с* *см.* **добыва́ть**; **добыва́ние хле́ба насу́щного** көндәлек ризыҡ табыу

**ДОБЫВА́ТЬ** *несов.* *см.* **добы́ть**

**ДОБЫВА́ТЬСЯ** *несов.* *страд.* *от* **добыва́ть**

**ДОБЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ое *прич.* *от* **добыва́ть** ♦ **добыва́ющая промы́шленность** сеймал табыу һәм яғыулыҡ әҙерләү сәнәғәте

**ДОБЫ́ТЧИК** *м* **1.** *разг.* табыусы, хәстәрләүсе; **добы́тчик зо́лота** алтын табыусы **2.** *прост.* мал (аҡса) табыусы, малтабар

**ДОБЫ́ТЧИЦА** *ж*; *прост.* *см.* **добы́тчик** 2

**ДОБЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*достать, разыскать*) табыу, табып алыу, эҙләп табыу (алыу), хәстәрләү, булдырыу; **добы́ть необходи́мую кни́гу** кәрәкле китапты табыу **2.** *что, чего* (*заработать*) табыу, эшләп табыу (алыу); **добы́ть де́нег** аҡса эшләп табыу **3.** *кого-что* (*получить, охотясь*) аулап (атып) алыу; **добы́ть бе́лок** тейен аулап алыу **4.** *что*; *спец.* (ҡаҙып) сығарыу, алыу; **добы́ть нефть** нефть сығарыу; **добы́ть хими́ческим путём** химик юл менән сығарыу

**ДОБЫ́ЧА** *ж* **1.** *см.* **добы́ть**; **добы́ча не́фти** нефть сығарыу; **добы́ча пушно́го зве́ря** затлы тиреле йәнлек аулау **2.** табыш; **добы́ча охо́тника** һунарсы табышы; **вое́нная добы́ча** хәрби табыш

**ДОВА́РИВАТЬ** *несов.* *см.* **довари́ть**

**ДОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **довари́ться** **2.** *страд.* *от* **дова́ривать**

**ДОВАРИ́ТЬ** *сов.* *что* бешереп еткереү (сығарыу, ҡуйыу); **довари́ть суп** ашты бешереп сығарыу

**ДОВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* бешеп етеү (бөтөү); **пусть мя́со дова́рится** ит бешеп етһен

**ДОВЕЗТИ́** *сов.* *кого-что* алып барып ҡуйыу (еткереү), илтеп ҡуйыу; **довезти́ до до́му** өйгә хәтлем алып барып ҡуйыу

**ДОВЕ́РЕННОСТЬ** *ж* ышаныс ҡағыҙы; **дове́ренность на получе́ние зарпла́ты** эш хаҡы алыу өсөн ышаныс ҡағыҙы

**ДОВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **дове́рить 2.** *прил.* ышаныслы, ышанып бирелгән (күрһәтелгән); **дове́ренный представи́тель** ышаныслы вәкил

**ДОВЕ́РИЕ** *с* ышаныу, ышаныс; **войти́ в дове́рие** ышаныс ҡаҙаныу; **лиши́ть дове́рия** ышаныстан мәхрүм итеү; **не внуша́ть дове́рия** ышаныcһыҙ булыу ♦ **во́тум дове́рия** ышаныс белдереү ҡарары

**ДОВЕРИ́ТЕЛЬ** *м* ышаныс ҡағыҙы биреүсе, ышанып эш тапшырыусы (*кеше*)

**ДОВЕРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ышаныс белдергән, ышанып әйтелгән, ихлас; **довери́тельный тон** ышаныс белдергән тон **2.** *уст.* ышаныс ...ы, ышаныу ...ы; **довери́тельный докуме́нт** ышаныс документы

**ДОВЕ́РИТЬ** *сов. кого-что, кому-чему* ышанып биреү (ебәреү, ҡалдырыу, тапшырыу); **дове́рить де́ньги** аҡсаны ышанып биреү; **дове́рить свою́ та́йну** сереңде ышанып һөйләү

**ДОВЕ́РИТЬСЯ** *сов. кому-чему* ышаныу, ышаныс белдереү; **дове́риться проводнику́** юл күрһәтеүсегә ышаныу

**ДО́ВЕРХУ** *нареч.* тултырып, тултырғансы; (*о ёмкостях*) өҫтөнә сыҡҡансы; (*о чистой воде*) мөлдөрәмә итеп; **напо́лнить корзи́ну до́верху** кәрзинде тултырғансы һалыу; **нали́ть воды́ в ведро́ до́верху** һыуҙы күнәккә мөлдөрәмә итеп тултырыу ♦ **сни́зу до́верху** аҫтан өҫкә саҡлы (тиклем)

**ДОВЕ́РЧИВО** *нареч.* ышаныс менән, ышаныс бағлап; **смотре́ть дове́рчиво** ышаныс менән ҡарау

**ДОВЕ́РЧИВОСТЬ** *ж* ышаныусанлыҡ; **показа́ть изли́шнюю дове́рчивость** артыҡ ышаныусанлыҡ күрһәтеү

**ДОВЕ́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое (тиҙ) ышаныусан, ышанып барыусан, ышаныслы; **дове́рчивый челове́к** тиҙ ышаныусан кеше; **дове́рчивое отноше́ние** ышаныслы мөнәсәбәт

**ДОВЕРША́ТЬ** *несов. см.* **доверши́ть**

**ДОВЕРШЕ́НИЕ** *с см.* **доверши́ть** — **доверша́ть**

**ДОВЕРШИ́ТЬ** *сов. что* бөтөрөү, тамамлау, ослау, теүәлләү, аҙағына еткереү; **доверши́ть на́чатое де́ло** башланған эште аҙағына еткереү

**ДОВЕРШИ́ТЬСЯ** *сов.* бөтөү, ослаңыу, тамамланыу, аҙағына (ахырына) етеү; **стро́йка доверши́тся к концу́ го́да** төҙөлөш йыл аҙағына тамамланыр

**ДОВЕРЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **дове́рить 2.** *кому* (*испытывать доверие*) ышаныу, ышанып ҡарау (тапшырыу)

**ДОВЕРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **дове́риться 2.** *страд. от* **доверя́ть** 1

**ДОВЕ́СОК** *м* өҫтәмә, өҫтәмә киҫәк (*үлсәүҙе билдәле ауырлыҡҡа еткереү өсөн һалынған өҫтәмә киҫәк*); **мя́со с дове́ском** өҫтәмә киҫәге булған ит

**ДОВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (*доставить*) алып барып (илтеп) ҡуйыу; **довести́ до до́му** өйөнә илтеп ҡуйыу **2.** *кого-что* еткереү, алып барып еткереү; **довести́ де́ло до конца́** эште аҙағына алып барып еткереү **3.** килтереп еткереү, һуҙыу; **довести́ доро́гу до го́рода** юлды ҡалаға еткереү **4.** *что* (*сообщить, передать*) хәбәр итеү (еткереү); **довести́ информа́цию** хәбәр еткереү **5.** *кого-что* хәлгә еткереү, төшөрөү; **довести́ до нищеты́** бөлгөнлөккә төшөрөү; **довести́ до слёз** илар хәлгә еткереү ♦ **довести́ до бе́лого кале́ния** *кого* сығырынан сығарыу, ҡыҙҙырыу; **довести́ до кра́йности** *кого* ахыр сиккә еткереү; **довести́ до све́дения** белдереү, мәғлүм итеү

**ДОВЕСТИ́СЬ** *сов. кому-чему* и *с неопр.*; *безл. разг.* тура килеү; **мне довело́сь встре́титься** миңә осрашырға тура килде

**ДО́ВОД** *м* дәлил; **ве́ский до́вод** төплө дәлил; **приводи́ть необосно́ванные до́воды** нигеҙһеҙ дәлилдәр килтереү

**ДОВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **довести́**

**ДОВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **довести́сь 2.** *кому*; *разг.* булыу, тейеш; **доводи́ться ро́дственником** туған булыу **3.** *страд. от* **доводи́ть**

**ДОВОЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое һуғышҡа тиклемге, һуғыштан (алда) элгәре, һуғышҡаса булған; **довое́нное вре́мя** һуғышҡа тиклемге ваҡыт

**ДОВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **довезти́**

**ДОВО́ЛЬНО** *нареч.* **1.** ҡәнәғәтләнеп, ҡәнәғәтлек менән; **дово́льно улыба́ться** ҡәнәғәтлек менән йылмайыу **2.** *в знач. сказ., безл.* етер, етте, етерлек; **дово́льно, да́льше нельзя́ терпе́ть** етер, артабан түҙергә ярамай; **с меня́ и э́того дово́льно** минән шул да еткән **3.** (*в достаточной степени*) байтаҡ, шаҡтай; **бы́ло уже́ дово́льно по́здно** байтаҡ һуң ине инде

**ДОВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡәнәғәт, риза; **дово́льный вид** ҡәнәғәт төҫ; **быть дово́льным** риза булыу

**ДОВО́ЛЬСТВИЕ** *с*; *воен.* тәьминәт, тәьмин итеү; **де́нежное дово́льствие** аҡсалата тәьмин итеү; **зачи́слить на дово́льствие** тәьминәткә ҡуйыу

**ДОВО́ЛЬСТВО** *с* **1.** ҡәнәғәтлек, ризалыҡ; **лицо́ его́ выража́ло по́лное дово́льство** уның йөҙөндә тулы ҡәнәғәтлек күренә ине **2.** муллыҡ, етеш(лек), мул (етеш) тормош; **жить в дово́льстве** етеш йәшәү

**ДОВО́ЛЬСТВОВАТЬ** *несов. кого-что*; *воен.* тәьмин итеү; **дово́льствовать а́рмию** армияны тәьмин итеү

**ДОВО́ЛЬСТВОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем* ҡәнәғәтләнеү, ҡәнәғәт (риза) булыу; **дово́льствоваться ма́лым** аҙға ҡәнәғәт булыу **2.** *воен.* тәьмин ителеү

**ДОВЫ́БОРЫ** *только мн.* өҫтәмә һайлауҙар; **назна́чить довы́боры** өҫтәмә һайлауҙар билдәләү

**ДОГ** *м* дог (*эре эт токомо*)

**ДОГАДА́ТЬСЯ** *сов.* белеү, һиҙеү, белеп (һиҙе(не)п) алыу, башка килеү (етеү), иҫкә төшөү, төшөнөү; **догада́ться закры́ть газ** газды ябырға баш етеү; **догада́ться во́время уйти́** китергә кәрәклекте һиҙеп алыу

**ДОГА́ДКА** *ж* **1.** фараз (итеү), юрау, тоҫмаллау; **необходи́мы фа́кты, а не дога́дки** фараз итеү түгел, ә факттар кәрәк **2.** *разг.* (*сообразительность*) зирәклек, тапкырлык, откорлок; **прояви́ть дога́дку** зирәклек күрһәтеү ♦ **теря́ться в дога́дках** ни юрарға белмәй баш катыу (аптырау)

**ДОГА́ДЛИВОСТЬ** *ж* зирәклек, һиҙгерлек, тапкырлык

**ДОГА́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое зирәк, һиҙгер, тапкыр; **дога́дливый челове́к** һиҙгер кеше

**ДОГА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **догада́ться**

**ДОГЛА́ДИТЬ** *сов. что* үтекләп бөтөрөү (бөтөү)

**ДОГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **догла́дить**

**ДОГЛЯДЕ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* карап (бөтөрөп куйыу) бөтөрөү; **догляде́ть кино́ до конца́** киноны аҙағына хәтле карап бөтөрөү ♦ **не догляде́ть** *за кем-чем* и *без доп.* күрмәй (аңғармай, һиҙмәй) калыу, күҙҙән ыскындырыу

**ДОГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **догляде́ть**

**ДО́ГМА** *ж* **1.** догма, канун (*бер касан да үҙгәрмәй торған, бәхәсһеҙ кабул ителгән кағиҙә*) **2.** *обычно мн.* **до́гмы** канун, кағиҙә; **до́гмы ри́мского пра́ва** Рим хокуктарының кануны

**ДО́ГМАТ** *м* догмат, дин кануидары

**ДОГМАТИ́ЗМ** *м* догматизм, догмасылык (*тәнкит күҙлегенән карамайынса, канундарға һукыр рәүештә ышанып, уларға таянып фекер йөрөтөү ысулы*)

**ДОГМА́ТИК** *м* догмасы, догматик

**ДОГМАТИ́ЧЕСКИЙ** и **ДОГМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** догматик, догмаларға нигеҙләнгән; **догмати́ческое мышле́ние** догматик фекерләү **2.** догматик, кәтғи, киҫкен; **догмати́ческое нравоуче́ние** кәтғи өгөт-нәсихәт

**ДОГНА́ТЬ** *сов. кого-что* кыуып етеү (еткереү); **догна́ть проти́вника** дошманды кыуып етеү; **догна́ть нефть до уча́стка** нефтте участкаға кыуып еткереү

**ДОГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **договори́ть**

**ДОГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **договори́ться 2.** *страд. от* **догова́ривать**

**ДОГОВО́Р** и *разг.* **ДО́ГОВОР** *м* договор, килешеү; **догово́р о дру́жбе и взаи́мной по́мощи** дуҫлык һәм үҙ-ара ярҙамлашыу тураһында килешеү

**ДОГОВОРЁННОСТЬ** *ж* (алдан) килешеү, килешеп (һөйләшеп) куйыу, бер фекергә килгәнлек; **де́йствовать на осно́ве договорённости** алдан килешеү буйынса эш итеү

**ДОГОВОРИ́ТЬ** *сов. что* һөйләп бөтөү (бөтөрөү), әйтеп бөтөү (бөтөрөү); **дать возмо́жность договори́ть свою́ мысль** үҙ фекерен әйтеп бөтөрөргә мөмкинлек биреү

**ДОГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *о чём* килешеү, бер фекергә килеү, һүҙ (беркетеү) куйышыу; **договори́ться о встре́че** осрашыу тураһында һүҙ беркетеү **2.** *до чего* һөйләй торғас, -ға/-гә барып етеү, һөйләй-һөйләй -ға/-гә төшөп китеү; **договори́ться до неле́постей** һөйләй торғас, кеше ышанмаҫ һүҙгә төшөп китеү

**ДОГОВО́РНИК** *м*; *разг.* штаттан тыш (эшсе), килешеү буйынса эшләүсе

**ДОГОВО́РНЫЙ,** -ая, -ое килешеү ...ы, договор ...ы, договорҙа, (килешеүҙә) каралған; **догово́рные обяза́тельства** килешеү йөкләмәләре; **догово́рные усло́вия** килешеүҙә каралған шарттар

**ДОГОЛА́** *нареч.* шыр ялангас, шәп-шәрә итеп, инәнән тыума, тап-такыр итеп; **разде́ться догола́** шыр ялангас сисенеп ташлау

**ДОГОНЯ́ЛКИ** *мн.*; *прост.* кыуышып (баҫтырышып) уйнау (*балалар уйыны*)

**ДОГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **догна́ть**

**ДОГОРА́ТЬ** *несов. см.* **догоре́ть**

**ДОГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** яныу, янып бөтөү, бөткәнсе яныу; **свеча́ догоре́ла** май шәм янып бөттө **2.** *перен.* һүнеү, батыу; **заря́ догоре́ла** шәфәк батты

**ДОГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **догрести́**

**ДОГРЕСТИ́** *сов.* ишеп барып етеү; **е́ле догрести́ до бе́рега** ярға саҡ ишеп барып етеү

**ДОГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **догрузи́ть**

**ДОГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **догрузи́ться 2.** *страд. от* **догружа́ть**

**ДОГРУЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*окончить погрузку*) йөк тейәп бөтөү; **догрузи́ть парохо́д** пароходка йөк тейәп бөтөү **2.** *чего* (*добавить*) йөк өҫтәү, өҫтәп тейәү; **догрузи́ть карто́феля в маши́ну** машинаға картуф өҫтәп тейәү

**ДОГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.* өҫтәп тейәлеү

**ДОГРУ́ЗКА** *ж см.* **догрузи́ть**

**ДОГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **догры́зть**

**ДОГРЫ́ЗТЬ** *сов. что* кимереп бөтөү, бөткәнсе кимереү

**ДОГУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **догуля́ть**

**ДОГУЛЯ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* (йөрөп) үткәреп бөтөү, йөрөп (байрам итеп, ял итеп) үткәреү; **коне́ц о́тпуска догуля́л в дере́вне** ялдың аҙағын ауылда йөрөп үткәрҙем

**ДОГУЛЯ́ТЬСЯ** *сов. до чего*; *разг.* -ғансы/-гәнсе йөрөү; **догуля́ться до просту́ды** һыуык үткәргәнсе (алдырғансы) йөрөү

**ДОДАВА́ТЬ** *несов. см.* **дода́ть**

**ДОДА́ТЬ** *сов. что, чего* биреп бөтөрөү (еткереү, куйыу), өҫтәп биреү; **дода́ть недостаю́щее** етмәгәнен биреп бөтөрөү

**ДОДЕ́ЛАТЬ** *сов. что* эшләп (яһап) бөтөрөү, эшләп (яһап) бөтөрөп куйыу, эшләп еткереү; **доде́лать портре́т** портретты эшләп бөтөрөү

**ДОДЕ́ЛКА** *ж* (*результат доделывания*) өҫтәлмә эш, өҫтәп ҡуйылған эш; **доде́лка пло́тника** балта оҫтаһының өҫтәлмә эше

**ДОДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **доде́лать**

**ДОДЕ́ЛЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **доде́лывать**

**ДОДЕРЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* -ға/-гә (тиклем, саҡлы) тотоу; **додержа́ть соба́ку до́ма до потепле́ния** көн йылынғансы этте өйҙә тотоу **2.** *что* (*выдержать время до завершения*) тотоу, тотоп еткереү; **додержа́ть ещё пять мину́т** тағы биш минут тоторға

**ДОДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.* -ға/-гә тиклем тотолоу

**ДОДУ́МАТЬ** *сов. что* уйлап бөтөрөү (еткереү)

**ДОДУ́МАТЬСЯ** *сов.* уйлап табыу (сығарыу), бер һығымтаға (фекергә) килеү, баш (аҡыл) етеү

**ДОДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **доду́мать**

**ДОДУ́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **доду́маться** **2.** *страд. от* **доду́мывать**

**ДОЕДА́ТЬ** *несов. см.* **дое́сть**

**ДОЕЗЖА́ТЬ** *несов. см.* **дое́хать**

**ДОЕ́НИЕ** *с* һауыу; **маши́нное дое́ние** машина менән һауыу

**ДОЕ́СТЬ** *сов. что* ашап бөтөрөү, бөткәнсе ашау; **дое́сть ка́шу** бутҡаны ашап бөтөрөү

**ДОЕ́ХАТЬ** *сов.* барып (килеп) етеү; **дое́хать до дере́вни** ауылға барып етеү

**ДОЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **дожа́рить**

**ДОЖА́РИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **дожа́ривать**

**ДОЖА́РИТЬ** *сов. что* ҡурып сығарыу (еткереү), еткерә (еткәнсе) ҡурыу (ҡыҙҙырыу); **дожа́рить котле́ты** котлеттарҙы еткәнсе ҡыҙҙырыу

**ДОЖА́РИТЬСЯ** *сов.* ҡурылып етеү (сығыу); **ры́ба дожа́рилась** балыҡ ҡурылып етте; **жарко́е дожа́рилось** ҡурҙаҡ ҡурылып сыҡты

**ДОЖА́ТЬ** *сов. что* урып бөтөү (бөтөрөү); **дожа́ть оста́вшуюся рожь** ҡалған арышты урып бөтөү

**ДОЖДА́ТЬСЯ** *сов.* көтөү, көтөп (алыу) тороу; **дожда́ться по́езда** поезды көтөп алыу; **не дожда́ться ле́та** йәйҙе көтөп ала алмау ♦ **ждать не дожда́ться** дүрт күҙ менән көтөү, көтә-көтә көтөк булыу

**ДОЖДЕВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыу һиптергес, ямғыр яуҙырғыс; **дождева́льный аппара́т** ямғыр яуҙырғыс аппарат

**ДОЖДЕВА́НИЕ** *с* һыу һиптереү (һиптертеү), ерҙе һуғарыу

**ДОЖДЕВИ́К** *м* **1.** *разг.* йоҡа плащ **2.** *бот.* (*гриб*) һаңғырау бәшмәк

**ДОЖДЕВО́Й,** -ая, -ое ямғыр ...ы; **дождева́я вода́** ямғыр һыуы; **дождевы́е пото́ки** ямғыр гөрләүектәре ♦ **дождево́й гриб** *бот.* һаңғырау бәшмәк; **дождево́й червь** *зоол.* ямғыр селәүсене

**ДОЖДЕМЕ́Р** *м* яуым үлсәгес, яуым-төшөм үлсәгесе (*ямғыр йәки ҡар төшөмө күләмен үлсәй торған ҡорамал*)

**ДО́ЖДИК** *м*; *уменьш. от* **дождь**

**ДО́ЖДИЧЕК** *м*; *разг.*; *уменьш.-ласк. от* **до́ждик** ♦ **по́сле до́ждичка в четве́рг** ҡыҙыл ҡар яуғас, дөйә ҡойроғо ергә тейгәс (*булыры билдәһеҙ йәки икеле*)

**ДОЖДЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ямғырлы, яуынлы; **дождли́вая о́сень** яуынлы көҙ

**ДОЖДЬ** *м* ямғыр; **осе́нний дождь** көҙгө ямғыр; **пе́рвый весе́нний дождь** ләйсән ямғыр; **проливно́й дождь** ҡойма ямғыр; **дождь мороси́т** ямғыр күҙе төшә; **дождь льёт как из ведра́** ямғыр ҡойоп яуа ♦ **золото́й дождь** көтмәгәндә килеп ингән аҡса

**ДОЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **дожи́ть**

**ДОЖИДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **дожда́ться**

**ДОЖИНА́ТЬ** *несов. см.* **дожа́ть**

**ДОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *до чего* йәшәү, -ғансы/-гәнсе, -ға/-гә тиклем (хәтле) йәшәү, иҫән-һау тороу; **дожи́ть до глубо́кой ста́рости** ныҡ ҡартайғансы йәшәү; **дожи́ть до возвраще́ния сы́на** улы ҡайтҡансы иҫән-һау тороу; **дожи́ть до зимы́** ҡышҡа хәтле иҫән-һау тороу **2.** *что*; *разг.* (*провести остаток времени*) үткәреү, ғүмер итеү; **оста́ток жи́зни дожи́ть в дере́вне** ҡалған ғүмерҙе ауылда үткәреү

**ДО́ЗА** *ж* доза, үлсәнгән (бүленгән) өлөш (миҡдар, үлсәм, бирәмек); **до́за лека́рства** дарыуҙың миҡдары; **до́за радиацио́нного излуче́ния** радиацияның нурланыш бирәмеге ♦ **лошади́ная до́за** күп күләмдәге доза (*дарыу эсеүҙә ҙур дозаға ҡарата*)

**ДОЗА́ТОР** *м* дозатор (*матдәне билдәле бер күләмдә үлсәү өсөн йайлама*)

**ДОЗВА́ТЬСЯ** *сов. кого*; *разг.* саҡырып алыу (сығарыу, ҡайтарыу); **е́ле дозва́ться** саҡ саҡырып алыу; **тебя́ не дозовёшься** һине саҡырып сығара алмаҫһың

**ДОЗВО́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **дозво́лить** **2.** *прил.* рөхсәт ителгән, яраған, мөмкин булған; **дозво́ленное вре́мя** рөхсәт ителгән ваҡыт; **дозво́ленные приёмы борьбы́** көрәштә рөхсәт ителгән алымдар

**ДОЗВО́ЛИТЬ** *сов. что* и *с неопр.*; *уст.* рөхсәт итеү; **дозво́лить уйти́** китергә рөхсәт итеү

**ДОЗВОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **дозво́лить**

**ДОЗВОНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шылтыратып һөйләшеү (яуап алыу)

**ДОЗИ́МЕТР** и **ДОЗИМЕ́ТР** *м* дозиметр (*ион нурланышы дозаһын үлсәү ҡорамалы*)

**ДОЗИМЕ́ТРИЯ** *ж* дозиметрия (*физика фәненең радиоактив нур дәрәжәһен, миҡдарын, сығанаҡтарҙың активлығын билдәләгән тармағы*)

**ДОЗИ́РОВАНИЕ** *с см.* **дози́ровать**

**ДОЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* дозалау, өлөшләү, өлөштәргә бүлеү (бүлгеләү), өлөшкә бүлеп үлсәү; **дози́ровать лека́рства** дарыуҙарҙы дозалау

**ДОЗИРО́ВКА** *ж* өлөштәргә (миҡдарға) бүлеү, дозалау; **то́чная дозиро́вка** теүәл дозалау (бүлеү)

**ДОЗНА́НИЕ** *с*; *юр.* тәүтикшереү, тәүләп һорау алыу

**ДОЗНА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һорашып (төпсөнөп) белеү, асылына төшөнөү; **дозна́ться об у́гнанной маши́не** урланған машина тураһында төпсөнөп белеү

**ДОЗО́Р** *м* алсапҡы (*отряд*); дозор ♦ **быть в дозо́ре** (сиктә) һаҡта тороу, дозорҙа тороу; **обходи́ть дозо́ром** күҙәтеп (ҡарап) йөрөү, ҡарап сығыу

**ДОЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күҙәтеүсе ...ы, дозор ...ы; **дозо́рный ка́тер** дозор катеры **2.** *в знач. сущ.* **дозо́рный** *м* күҙәтеүсе, дозор; **сме́на дозо́рных** дозорҙар алмашыныуы

**ДОЗРЕВА́НИЕ** *с см.* **дозрева́ть**

**ДОЗРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **дозре́ть**

**ДОЗРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое өлгөргән, бешкән, (бешеп) еткән, етешкән; **дозре́лые помидо́ры** бешкән помидорҙар

**ДОЗРЕ́ТЬ** *сов.* өлгөрөү, бешеү, өлгөрөп (бешеп) етеү, етешеү, етлегеү; **ви́шня дозре́ла** сейә бешкән; **пшени́ца дозре́ла** бойҙай өлгөргән

**ДОИГРА́ТЬ** *сов. что* уйнап бөтөрөү (бөтөү), уйынды тамамлау; **доигра́ть па́ртию в ша́хматы** шахмат партияһын уйнап бөтөрөү

**ДОИГРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** уйнай торғас, -ға/-гә етеү (терәлеү), -а/-ә башлау; **де́ти доигра́лись до дра́ки** уйнай торғас, балалар һуғыша башланы **2.** *перен.* бәләгә тарыу, уйындан уймаҡ сығарыу; **смотри́, доигра́ешься** ҡара, бәләгә тарырһың

**ДОИ́ГРЫВАНИЕ** *с см.* **дои́грывать**

**ДОИ́ГРЫВАТЬ** *несов. см.* **доигра́ть**

**ДОИ́ГРЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **дои́грывать**

**ДОИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һауыу ...ы, һөт һауа торған; **дои́льный агрега́т** һауыу агрегаты

**ДОИ́ЛЬЩИЦА** *ж* һауынсы ҡатын-ҡыҙ

**ДОИСКА́ТЬСЯ** *сов. кого-чего*; *разг.* эҙләп табыу, төпсөнөп белеү, төбөнә төшөү; **доиска́ться и́стины** хәҡиҡәтте эҙләп табыу

**ДОИ́СКИВАТЬСЯ** *несов. см.* **доиска́ться**

**ДОИСТОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тарихҡаса булған, бик боронғо, аҙманан алда булған; **доистори́ческий пери́од** тарихҡаса булған дәүер

**ДОИ́ТЬ** *несов. кого* һауыу; **дои́ть коро́ву** һыйыр һауыу

**ДОИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һөт биреү, һөтлө булыу; **коро́ва до́ится хорошо́** һыйыр һөттө яҡшы бирә **2.** *страд. от* **дои́ть**

**ДО́ЙКА** *ж* һауыу, һауын; **у́тренняя до́йка** иртәнге һауын

**ДО́ЙНИК** *м* һөт күнәге

**ДО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое һауын, һауыу ...ы; **до́йная коза́** һауын кәзә ♦ **до́йная коро́ва**: 1) һауын һыйыр; 2) *күсм.* файҙалы сығанаҡ

**ДОЙТИ́** *сов.* **1.** *до кого-чего* и *без доп.* барып (килеп, ҡайтып) етеү; **е́ле дойти́ до до́му** өйгә саҡ ҡайтып етеү; **письмо́ дошло́ до адреса́та** хат адресланған кешегә барып еткән **2.** *до чего* барып етеү, сиккә етеү; **моро́з дошёл до сорока́ гра́дусов** һалҡынлыҡ ҡырҡ градусҡа барып етте; **дойти́ до кра́йности** һуңғы сиккә етеү **3.** *разг.* үтеп инеү; **дойти́ до се́рдца зри́теля** тамашасы йөрәгенә үтеп инеү **4.** *разг.* (*стать готовым*) етеү, өлгөрөү, әҙер булыу, бешеп етеү; **те́сто дошло́** ҡамырҙың әсеүе етте; **помидо́ры дошли́ на подоко́ннике** помидорҙар тәҙрә төбөндә бешеп етте **5.** *до кого-чего*; *разг.* аңлашылыу, барып етеү, етешеү; **смысл его́ слов дошёл** уның һүҙҙәренең мәғәнәһе аңға барып етте ♦ **дойти́ до бе́лого кале́ния** ныҡ ҡыҙыу; **дойти́ до све́дения** билдәле булыу; **дойти́ до то́чки** сигенә барып етеү

**ДОК** *м* док (*суднолар ремонтлау урыны*)

**ДО́КА** *м* и *ж*; *прост.* дока (*үҙ эшендә, үҙ өлкәһендә шәп белгес, күп белеүсе*)

**ДОКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дәлил булырлыҡ, иҫбат итерлек, ышандырырлыҡ; **доказа́тельный приме́р** дәлил булырлыҡ миҫал

**ДОКАЗА́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** дәлил; **доказа́тельство его́ невино́вности** уның ғәйепһеҙлегенә дәлил **2.** *лог.* иҫбат, иҫбатлау, иҫбат итеү; **доказа́тельство теоре́мы** теорема иҫбатлау ♦ **веще́ственное доказа́тельство** *юр.* матди (әйберләтә) дәлил

**ДОКАЗА́ТЬ** *сов. что* иҫбатлау, иҫбат итеү; **доказа́ть невино́вность** ғәйепһеҙлекте иҫбатлау; **доказа́ть теоре́му** теореманы иҫбатлау

**ДОКАЗУ́ЕМОСТЬ** *ж* иҫбат итерлек булыу; **доказу́емость де́ла** эштең иҫбат итерлек булыуы

**ДОКАЗУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое иҫбат ителерлек, иҫбат итә алырлыҡ; **доказу́емое положе́ние** иҫбат ителерлек хәл

**ДОКА́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **дока́зывать**

**ДОКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **доказа́ть**

**ДОКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **дока́зывать**

**ДОКА́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **доко́нчить**

**ДОКА́НЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **дока́нчивать**

**ДОКАПИТАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое капитализмға тиклемге, капитализмға тиклем булған; **докапиталисти́ческое о́бщество** капитализмға тиклемге йәмғиәт

**ДОКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **докопа́ть**

**ДОКА́ПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **докопа́ться** **2.** *страд. от* **дока́пывать**



10 зак. 2.0084.05

**ДОКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*катя, переместить до места*) тәгәрләтеп еткереү; **докати́ть бо́чку до скла́да** мискәне складҡа хәтле тәгәрләтеп еткереү **2.** *разг.* (*быстро доехать*) барып етеү; **за полчаса́ докати́ли до ста́нции** станцияға ярты сәғәт эсендә барып еттеләр

**ДОКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*катясь, достичь какого-л. места*) тәгәрләп барып етеү (килеү, төшөү); **мяч докати́лся до воро́т** туп ҡапҡаға тәгәрләп барып етте **2.** (*донестись*) ишетелеү; **издалека́ докати́лся гро́хот взры́ва** алыҫтан шартлау тауышы ишетелде **3.** *перен., прост.* (*опуститься*) барып етеү (төшөү), хәлгә төшөү (ҡалыу); **вот до чего́ докати́лся** бына ниндәй хәлгә төштө

**ДОКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **докати́ть**

**ДОКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **докати́ться** **2.** *страд. от* **дока́тывать**

**ДО́КЕР** *м* докер (*портта йөк ташыусы*)

**ДОКЛА́Д** *м* доклад, сығыш, телмәр; **нау́чный докла́д** ғилми сығыш; **слу́шать докла́д** телмәр тыңлау

**ДОКЛАДНО́Й,** -ая, -ое **1.** аңлатма ...ы, доклад ...ы; **докладна́я запи́ска** доклад яҙмаһы, аңлатма яҙыуы **2.** *в знач. сущ.* **докладна́я** *ж*; *разг.* докладной; **написа́ть докладну́ю** докладной яҙыу

**ДОКЛА́ДЧИК** *м* и **ДОКЛА́ДЧИЦА** *ж* докладсы, доклад (телмәр) яһаусы

**ДОКЛА́ДЫВАТЬ I** *несов. см.* **доложи́ть** I

**ДОКЛА́ДЫВАТЬ II** *несов. см.* **доложи́ть** II

**ДОКЛА́ДЫВАТЬСЯ I** *несов. см.* **докла́дывать** I

**ДОКЛА́ДЫВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **докла́дывать** II

**ДОКЛА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое синыфтарға тиклемге (тиклем булған); **докла́ссовое о́бщество** синыфтарға тиклемге йәмғиәт

**ДОКО́ЛЕ** и **ДОКО́ЛЬ** *нареч.*; *уст.* **1.** ҡасанға (күпмегә) саҡлы, ҡасанғаса; **доко́ле мо́жно терпе́ть** ҡасанғаса түҙергә мөмкин **2.** -ғансы/-гәнсе; **жди, доко́ле насту́пит ле́то** йәй еткәнсе көт

**ДОКОНА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* хәлдән тайҙырыу, яфалап бөтөрөү, харап (һәләк) итеү, башына етеү, башын ашау

**ДОКО́НЧИТЬ** *сов. что* бөтөрөү, тамамлау, тамам итеү, ослап ҡуйыу; **доко́нчить на́чатое де́ло** башланған эште ослап ҡуйыу

**ДОКОПА́ТЬ** *сов. что* ҡаҙыу, ҡаҙып бөтөү (еткереү); **докопа́ть сад** баҡсаны ҡаҙып бөтөү

**ДОКОПА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *до чего* ҡаҙып барып етеү (төшөү); **докопа́ться до гли́нистого сло́я** балсыҡлы ҡатламға хәтле ҡаҙып төшөү **2.** *перен., разг.* ҡаҙынып (соҡсоноп) белеү, төпсөнөп табыу; **докопа́ться до су́ти де́ла** төпсөнөп асылын белеү

**ДОКРАСНА́** и **ДО́КРАСНА** *нареч.* ҡыҙарғансы, ҡыҙартҡансы, ҡып-ҡыҙыл булғансы; **растере́ть лицо́ докрасна́** битте ҡыҙарғансы ыуыу; **накали́ться докрасна́** ҡып-ҡыҙыл булғансы ҡыҙыу

**ДОКРИЧА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *кого*; *разг.* ҡысҡырып (һөрәнләп) ишеттереү; **е́ле-е́ле докрича́лся** ҡысҡырып саҡ ишеттерҙем **2.** *до чего* -ғансы/-гәнсе ҡысҡырыу; **докрича́ться до хрипоты́** ҡарлыҡҡансы ҡысҡырыу

**ДО́КТОР** *м* **1.** доктор (*иң юғары ғилми дәрәжә*); **до́ктор филологи́ческих нау́к** филология фәндәре докторы **2.** *разг.* врач, доктор, табип

**ДОКТОРА́НТ** *м* докторант (*фәнни цҙәккә беркетелеп, докторлыҡ диссертацияһы яҡларға әҙерләнеүсе ғалим*)

**ДОКТОРАНТУ́РА** *ж* докторантура (*фәндәр академияһының ғилми тикшеренеү цҙәктәрендә юғары дәрәжәле ғалимдар әҙерләү системаһы*)

**ДО́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое докторлыҡ; **до́кторская диссерта́ция** докторлыҡ диссертацияһы

**ДОКТРИ́НА** *ж* доктрина (*ғилми, сәйәси, фәлсәфәүи теория, система*); **госуда́рственная доктри́на** дәүләт доктринаһы

**ДОКТРИНЁР** *м* доктринёр, доктринасы (*теорияһы ысынбарлыҡҡа ҡаршы килһә лә, шуның буйынса һуҡырҙарса эш итеүсе*)

**ДОКТРИНЁРСКИЙ,** -ая, -ое доктринёрҙарса; **доктринёрское отноше́ние к де́лу** эшкә доктринёрҙарса мөнәсәбәт

**ДОКТРИНЁРСТВО** *с* доктринёрлыҡ, доктринёрҙарса эш итеү, доктринасылыҡ; **впада́ть в доктринёрство** доктринасылыҡҡа бирелеү

**ДОКУ́ДА** *нареч.*; *прост.* **1.** ҡайҙа (ҡайһы ергә) хәтле, ҡайһы ваҡытҡа хәтле; **доку́да е́дете?** ҡайҙа хәтле бараһығыҙ? **2.** -ғансы/-гәнсе, хәтле; **доку́да хвата́ет глаз** күҙ күреме еткәнгә хәтле

**ДОКУМЕ́НТ** *м* документ (**1.** *рәсми ҡағыҙ* **2.** *танытма* **3.** *тарихи яҙма акттар*); **предъявля́ть докуме́нт** документ күрһәтеү; **истори́ческие докуме́нты** тарихи документтар

**ДОКУМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** документаль, документтарға таянған (нигеҙләнгән); **документа́льная по́весть** документаль повесть; **документа́льный фильм** документаль фильм **2.** документтарҙағыса, документтағы кеүек (һымаҡ); **документа́льная то́чность** документтарҙағыса теүәллек

**ДОКУМЕНТА́ЦИЯ** *ж собир.* документтар; **техни́ческая документа́ция** техник документтар

**ДОКУМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* документлаштырыу, документтар менән нигеҙләү (раҫлау, нығытыу); **документи́ровать прое́кт** проектты документтар менән нигеҙләү

**ДОКУЧА́ТЬ** *несов. кому, чем*; *разг.* аптыратыу, ялҡытыу, маҙаға (теңкәгә) тейеү, ялҡытып

бөтөү; **докуча́ть вопро́сами** һорауҙар менән ялҡытып бөтөү

**ДОКУ́ЧЛИВЫЙ,** -ая, -ое ялҡытҡыс, маҙаға (теңкәгә) тейгес; **доку́чливый челове́к** ялҡытҡыс кеше

**ДОЛ** *м*; *уст.*, *трад.-поэт. см.* **доли́на ♦ за гора́ми, за дола́ми** Ҡаф тау артында, ете диңгеҙ аръяғында, бик алыҫта; **по гора́м, по дола́м** тауҙар, үҙәндәр буйлап

**ДОЛБА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *прост. см.* **долби́ть**

**ДОЛБИ́ТЬ** *несов. что* **1.** соҡоу, тишеү, соҡоп тишеү; **дя́тел долби́т де́рево** тумыртҡа ағас соҡой **2.** *прост.* (*беспрестанно твердить*) туҡыу, тылҡыу, ҡабатлау; **ско́лько ни долби́ — не понима́ет** ни саҡлы тылҡыһаң да — аңламай **3.** *прост.* (*зубрить*) ятлау, мәғәнәһен аңламай ятлау; **долби́ть табли́цу умноже́ния** ҡабатлау таблицаһын ятлау

**ДОЛБИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **долби́ть**

**ДОЛБЛЕ́НИЕ** *с см.* **долби́ть**

**ДОЛБЛЁНЫЙ,** -ая, -ое тишелгән, соҡолған, соҡоп (тишеп) эшләнгән; **долблёная ка́дка** соҡоп эшләнгән тәпән; **долблёная ло́дка** соҡоп яһалған кәмә

**ДОЛГ** *м* **1.** бурыс; **во́инский долг** ғәскәри бурыс; **гражда́нский долг** гражданлыҡ бурысы **2.** (*взятое взаймы*) бурыс, аласаҡ, бирәсәк, үтес; **взять в долг** бурысҡа алыу (алып тороу); **дать в долг** бурысҡа биреү (биреп тороу) **♦ быть в долгу́** бурыслы булыу; **долг платежо́м кра́сен** байрам ашы ҡара-ҡаршы; ала белһәң, бирә лә бел; **зале́зть в долги́** бурысҡа батыу; **не оста́ться в долгу́** *у кого*, *перед кем* яҡшылыҡты онотмау; **отда́ть после́дний долг** *кому* һуңғы хөрмәт күрһәтеү, оҙатыу (*үлгән кешене*); **пе́рвым до́лгом** беренсе сиратта (нәүбәттә); **по до́лгу слу́жбы** хеҙмәт ҡушыуы буйынса

**ДО́ЛГИЙ,** -ая, -ое оҙон, оҙаҡ; **до́лгая жизнь** оҙон ғүмер; **до́лгое молча́ние** оҙаҡ хәбәр бирмәү, хәбәр итмәү (*өндәшмәү*) **♦ до́лгая пе́сня** осоҡырыйы күренмәгән эш; **отложи́ть в до́лгий я́щик** (эште) билгеһеҙ ваҡытҡа кисектереү, оҙаҡҡа һуҙыу; **до́лгий гла́сный** *лингв.* оҙон һуҙынҡы

**ДО́ЛГО** *нареч.* оҙаҡ, оҙаҡ ваҡыт; **до́лго пришло́сь ожида́ть** оҙаҡ көтөргә тура килде **♦ до́лго ли** күп кәрәкме ни, күп кәрәкмәй; **до́лго ли до беды́ (до греха́)** бәлә аяҡ аҫтында, көтмәгәндә килеп сыға; **до́лго ли, ко́ротко ли** *трад.-поэт.* бер аҙ (бер ни ҡәҙәр) ваҡыттан һуң, бер аҙ ваҡыт үткәс; **как до́лго** оҙаҡҡамы, күпкәме, оҙаҡмы

**ДОЛГОВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҙон ғүмерле, мәңгелек, оҙаҡҡа һуҙылған; **долгове́чная дру́жба** оҙаҡҡа һуҙылған дуҫлыҡ **2.** оҙаҡҡа иҫәпләнгән, сыҙамлы, ныҡлы; **долгове́чное сооруже́ние** ныҡлы ҡоролма

**ДОЛГОВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое оҙайлы, оҙаҡ ваҡытлы, оҙаҡ ваҡытҡа иҫәпләнгән; **долговре́менная орбита́льная ста́нция** оҙаҡ ваҡытҡа иҫәпләнгән орбиталь станция

**ДОЛГОВЯ́ЗЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һонтор, һуйҙан; **долговя́зый па́рень** һонтор егет

**ДОЛГОЖДА́ННЫЙ,** -ая, -ое оҙаҡ (зарығып) көткән (көттөргән), оҙаҡ көтөп алынған; **долгожда́нные ве́сти** оҙаҡ көткән хәбәрҙәр

**ДОЛГОЖИ́ТЕЛЬ** *м* оҙон ғүмерле (оҙаҡ йәшәгән) ир-ат; **долгожи́тельница** *ж* оҙон ғүмерле (оҙаҡ йәшәгән) ҡатын-ҡыҙ

**ДОЛГОЛЕ́ТИЕ** *с* оҙон ғүмерлелек, оҙон ғүмерле булыу

**ДОЛГОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее күп йыллыҡ, күп йылдарға барған (һуҙылған); **долголе́тняя рабо́та** күп йылдарға һуҙылған эш; **долголе́тний о́пыт** күп йыллыҡ тәжрибә

**ДОЛГОНО́СИК** *м* оҙонморон (*ҡоротҡос ҡуңыҙ*)

**ДОЛГОПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое оҙон итәкле (салғыйлы, сабыулы)

**ДОЛГОСРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое оҙаҡ ваҡытлы, оҙайлы; **долгосро́чный креди́т** оҙайлы кредит

**ДОЛГОТА́** *ж* **1.** оҙонлоҡ; **долгота́ дня** көндөң оҙонлоғо **2.** *геогр.* оҙонлоҡ; **за́падная долгота́** көнбайыш оҙонлоҡ

**ДОЛГОТЕРПЕ́НИЕ** *с* сабырлыҡ, ҙур сыҙамлылыҡ (түҙемлелек); **благодари́ть за долготерпе́ние** сабырлыҡ өсөн рәхмәт әйтеү

**ДОЛГУНЕ́Ц: лён-долгуне́ц** *м* оҙон сүсле етен

**ДОЛЕВО́Й I,** -ая, -ое буй, буйға; **долево́й разре́з де́рева** ағасты буйға (буй) ярыу

**ДОЛЕВО́Й II,** -ая, -ое өлөшләп бүленә торған, өлөшләтә; **долево́е уча́стие** өлөшләтә ҡатнашлыҡ, өлөшкә кереү (инеү)

**ДОЛЕДНИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое боҙлоҡ дәүеренә тиклемге; **доледнико́вый пери́од** боҙлоҡ дәүеренә тиклемге осор

**ДОЛЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *до чего* -ғансы/-гәнсе ятыу, саҡлы ятыу; **долежа́ть до выздоровле́ния** һауыҡҡансы ятыу **2.** (*дозреть*) өлгөргәнсе (етешкәнсе, бешкәнсе) ятыу; **помидо́ры должны́ долежа́ть** помидорҙар етешкәнсе ятырға тейеш

**ДОЛЁЖИВАТЬ** *несов. см.* **долежа́ть**

**ДОЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **доле́зть**

**ДОЛЕ́ЗТЬ** *сов.* барып (килеп, тырмашып) менеү, менеп етеү; **доле́зть до маку́шки де́рева** ағас башына менеп етеү

**ДОЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **долете́ть**

**ДОЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп барып (килеп) етеү **2.** *перен.* (*донестись — о звуках, запахах и т.д.*) ишетелеү, (тауышы) барып (килеп) етеү; **с о́зера долете́л крик** күлдән тауыш ишетелде

**ДОЛЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **долечи́ть**

**ДОЛЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **доле́чивать**

**ДОЛЕЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** дауалап бөтөрөү, ауырыуы бөткәнсе (ауырыуын бөтөргәнсе) дауалау, дауалап бөтөрөп ҡуйыу **2.** *разг.* дауа-

лай белмәйенсә ауырыуҙың хәлен насарайтыу, яңылыш дауалау

**ДО́ЛЖЕН** *в знач. сказ.* **1.** *кому* (*обязан*) бурыслы булыу, бирәсәкле булыу; **я вам до́лжен сто рубле́й** минең һеҙгә йөҙ һум бирәсәгем бар **2.** *с неопр.* тейеш; **мы должны́ верну́ться** беҙ ҡайтырға тейешбеҙ ♦ **должно́ быть** *в знач. вводн. сл.* ихтимал, моғайын

**ДОЛЖНИ́К** *м* бурыслы (бирәсәкле) ир-ат; **должни́ца** *ж* бурыслы (бирәсәкле) ҡатын-ҡыҙ

**ДО́ЛЖНО** *в знач. сказ., безл., с неопр.* кәрәк, тейеш, ярай; **до́лжно слу́шаться ста́рших** ололарҙы тыңларға кәрәк

**ДОЛЖНОСТНО́Й,** -ая, -ое урындағы, хеҙмәттәге, вазифалағы, дәүләт хеҙмәтендәге, хеҙмәт ...ы, вазифа ...ы; **должностны́е обя́занности** вазифа бурыстары ♦ **должностно́е лицо́** вазифалы кеше

**ДО́ЛЖНОСТЬ** *ж* вазифа, хеҙмәт, хеҙмәт урыны; **до́лжность дире́ктора** директор вазифаһы; **занима́ть до́лжность** вазифа биләү

**ДО́ЛЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тейешле; **на до́лжной высоте́** тейешле юғарылыҡта **2.** *в знач. сущ.* **до́лжное** *с* тейешле баһа, тейешлеһе; **отда́ть до́лжное** тейешле баһа биреү

**ДОЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **доли́ть**

**ДОЛИ́НА** *ж* үҙән, уй, уйһыу, үҙәк; (*горная*) ҡул; **широ́кая доли́на** киң үҙән

**ДОЛИ́ННЫЙ,** -ая, -ое үҙән ...ы; **доли́нные зе́мли** үҙән ерҙәр

**ДОЛИ́ТЬ** *сов. что, чего* өҫтәү, өҫтәп ҡойоу (һалыу), тултырыу, тултырғансы һалыу (ҡойоу); **доли́ть молока́ в кака́о** какаоға һөт өҫтәп ҡойоу

**ДО́ЛЛАР** *м* доллар (*АҠШ, Канада, Австралия һ.б. илдәрҙә аҡса берәмеге*)

**ДО́ЛЛАРОВЫЙ,** -ая, -ое доллар ...ы

**ДОЛОЖИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* яҙып (һөйләп) биреү; **доложи́ть о результа́тах прове́рки** тикшереү һөҙөмтәләрен яҙып биреү **2.** *что, о ком-чём* и *без доп.* белгертеү, рәсми хәбәр итеү, әйтеү; **доложи́ть о прихо́де представи́теля** вәкилдең килеүе тураһында хәбәр итеү

**ДОЛОЖИ́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* **1.** *чего* өҫтәү, өҫтәп һалыу, тултырыу; **доложи́ть ка́ши в таре́лку** тәрилкәгә бутҡа өҫтәп һалыу **2.** (*окончить кладку*) һалып (сығарып) бөтөрөү (бөтөү); **доложи́ть печь** мейесте сығарып бөтөү

**ДОЛО́Й** *нареч.*; *разг.* юғалһын, юҡ булһын, бөтһөн; **уйди́ с глаз доло́й** күҙемдән юғал, күҙ алдымдан юҡ бул; **доло́й войну́!** бөтһөн һуғыш!

**ДОЛОМА́ТЬ** *сов. что* ватып (һындырып, емереп) бөтөрөү; **долома́ть кре́сло** креслоны ватып бөтөрөү

**ДОЛОМА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **долома́ть**

**ДОЛОМИ́Т** *м*; *мин.* доломит (*кальцийлы, магнезийлы аҡһыл-һорғолт таш*)

**ДОЛОМИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** доломитлы, доломиты булған, доломит ...ы; **доломи́товый пласт** доломитлы ҡатлам **2.** доломит ...ы, доломиттан яһалған; **доломи́товые изде́лия** доломиттан яһалған әйберҙәр

**ДОЛОТО́** *с* **1.** ҡасау **2.** *горн.* бырау (*нефть быраулау эшендә*)

**ДО́ЛЬКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **до́ля 2.** (*часть плода цитрусовых*) өлөш, бүлкә; **до́лька апельси́на** әфлисун бүлкәһе

**ДО́ЛЯ** *ж* **1.** өлөш, киҫәк; **раздели́ть на до́ли** киҫәктәргә бүлеү **2.** (*судьба*) яҙмыш, тәҡдир; **го́рькая до́ля** әсе яҙмыш; **счастли́вая до́ля** бәхетле яҙмыш ♦ **до́ля пра́вды** бер аҙ дөрөҫлөк; **на до́лю (вы́пасть, прийти́сь)** *чью, кому* өлөшкә төшөү

**ДОМ** *м* **1.** өй, йорт; **деревя́нный дом** ағас өй; **де́тский дом** балалар йорто **2.** йорт, хужалыҡ; **хлопота́ть по до́му** хужалыҡ (йорт) эше менән шөғөлләнеү **3.** өй эсе, ғаилә; **всем до́мом пойти́ в го́сти** ғаилә менән ҡунаҡҡа барыу; **приня́ть в дом** ғаиләгә алыу **4.** йорт; **Дом культу́ры** Мәҙәниәт йорто; **дом о́тдыха** ял йорто **5.** (*династия, род*) зат, ырыу, нәҫел; **дом Рома́новых** Романовтар нәҫеле ♦ **на́ дом** өйгә; **на дому́** өйҙә

**ДО́МА** *нареч.* **1.** өйҙә; **находи́ться до́ма** өйҙә булыу **2.** (*в родных местах*) илдә, тыуған яҡта; **у себя́ до́ма лу́чше** үҙеңдең илеңдә яҡшыраҡ ♦ **как до́ма (быть, чу́вствовать и т.д.)** тартынмау, иркен, өйҙәге кеүек тотоу; **не все до́ма** *у кого* аҡылы етешмәй, ҡырҡҡа берәү тулмай, утыҙ туғыҙлы

**ДОМА́ШНИЙ,** -яя, -ее **1.** өйҙәге, йорттағы, өй (йорт) ...ы; **дома́шний а́дрес** өй адресы; **дома́шняя обстано́вка** өй шарты **2.** (*о животных*) йорт ...ы; **дома́шние живо́тные** йорт хайуандары **3.** өйҙә әҙерләнгән; **дома́шний обе́д** өйҙә әҙерләнгән төшкө аш **4.** *в знач. сущ.* **дома́шние** *мн.* өйҙәгеләр, өй эсе; **как твои́ дома́шние?** өйҙәгеләрең нисек? ♦ **дома́шний аре́ст** өйҙәге тотҡонлоҡ, өйҙән сыҡмаҫҡа ҡушыу; **дома́шний оча́г** тыуған йорт

**ДО́МБРА, ДОМБРА́** и *обл.* **ДУМБЫРА́** *ж*; *муз.* думбыра (*төрки халыҡтарҙа ҡыллы музыка ҡоралы*); **башки́рская домбра́** башҡорт думбыраһы; **каза́хская до́мбра** ҡаҙаҡ думбыраһы; **игра́ть на до́мбре** думбыра сиртеү, думбырала уйнау

**ДОМБРИ́СТ** *м* и **ДОМБРИ́СТКА** *ж* думбырасы, думбырала уйнаусы; **кварте́т домбри́стов** думбырасылар квартеты

**ДО́МЕННЫЙ,** -ая, -ое домна ...ы, домнала; **до́менная печь** домна мейесе; **до́менная пла́вка** домнала иретеү

**ДО́МЕНЩИК** *м* домнасы, домнала эшләүсе

**ДОМИНА́НТА** *ж*; *книжн.* **1.** доминанта, төп идея, төп билге **2.** *лингв.* төп һүҙ (*синонимдар рәтендә*)

**ДОМИНА́НТНЫЙ,** -ая, -ое өҫтөнлөк итеүсе, хөкөм һөрөүсе; **домина́нтное сло́во** өҫтөнлөк итеүсе һүҙ

**ДОМИНИО́Н** *м* доминион (*Бөйөк Британия империяһы эсенә ингән ųҙ аллы дәүләттәр — элекке колониялар исеме*)

**ДОМИНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **домини́ровать**

**ДОМИНИ́РОВАТЬ** *несов.* өҫтөнлөк алыу (итеү), өҫтөн булыу; **в выступле́нии домини́ровала одна́ мысль** сығышта бер фекер өҫтөнлөк алды

**ДОМИНО́ I** *с нескл.* домино (*маскарад костюмы һәм шул костюмды кейгән кеше*)

**ДОМИНО́ II** *с нескл.* домино (*уйын*); **игра́ть в домино́** домино уйнау

**ДОМКРА́Т** *м* домкрат, шаҡбаҫар (*ųтә ауыр нәмәләрҙе, мәҫ., машинаны һ.б. кųтәреų механизмы*); **ручно́й домкра́т** ҡул домкраты

**ДО́МНА** *ж* домна (*тимер рудаһынан суйын ҡойоу мейесе*)

**ДОМОВИ́ТЫЙ,** -ая, -ое хәстәрле, хужалыҡсыл, хәстәрлекле; **домови́тая хозя́йка** хәстәрле хужабикә

**ДОМОВЛАДЕ́ЛЕЦ** *м* йорт (өй) хужаһы; **домовладе́лица** *ж* йорт (өй) хужабикәһе, йортҡа (өйгә) хужа ҡатын-ҡыҙ; **собра́ние домовладе́льцев** өй хужалары йыйылышы

**ДОМОВЛАДЕ́НИЕ** *с*; *офиц.* йорт биләү (*ер менән бергә*)

**ДОМОВНИ́ЦА** *ж*; *прост.* йортта ҡалыусы, йортто ҡарап тороусы ҡатын-ҡыҙ

**ДОМОВНИ́ЧАТЬ** *несов.*; *прост.* йортто (өйҙө) ҡарау (һаҡлау)

**ДОМОВО́ДСТВО** *с* йорт хужалығы (**1.** *йортто, хужалыҡты алып барыу* **2.** *йорт хужалығы буйынса белешмә*)

**ДОМОВО́Й** *м*; *фольк.* йорт (өй) эйәһе

**ДОМО́ВЫЙ,** -ая, -ое йорт (өй) ...ы; **домо́вый водопрово́д** йорт һыу үткәргесе; **домо́вый сверчо́к** өй сиңерткәһе ♦ **домо́вая кни́га** йорт кенәгәһе

**ДОМОГА́ТЕЛЬСТВО** *с* нахаҡ дәғүә, нигеҙһеҙ талап; **отве́ргнуть домога́тельства** *чьи-л. берәйһенең* нигеҙһеҙ талабын кире ҡағыу

**ДОМОГА́ТЬСЯ** *несов. кого-чего-л. берәй нәмәгә* хаҡһыҙ (урынһыҙ) дәғүә итеү

**ДОМО́Й** *нареч.* **1.** өйгә; **пойти́ домо́й** өйгә ҡайтыу **2.** (*в родные места*) тыуған яҡҡа (илгә); **возвраща́ться домо́й** тыуған яҡҡа ҡайтыу

**ДОМОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **домолоти́ть**

**ДОМОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **домола́чивать**

**ДОМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* ашлыҡ (иген) һуғып бөтөү, иген һуғыуҙы тамамлау

**ДОМОЛО́ТЬ** *сов.* тарттырыу, тарттырып бөтөү; **домоло́ть зерно́** игенде тарттырып бөтөү

**ДОМОРО́ЩЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** йортта (хужалыҡта) үҫтерелгән (тәрбиәләнгән); **доморо́щенные ло́шади** хужалыҡта үҫтерелгән аттар **2.** *перен.*, *ирон.* урта ҡул, примитив, сикләнгән (фекерле); **доморо́щенный поэ́т** урта ҡул шағир

**ДОМОСЕ́Д** *м* и **ДОМОСЕ́ДКА** *ж* өйҙә генә ултырыусы, өй тауығы

**ДОМОСТРОИ́ТЕЛЬСТВО** *с* йорттар (өйҙәр) һалыу, торлаҡ төҙөү

**ДОМОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йорт (өй) һалыу ...ы; **домострои́тельный комбина́т** йорт һалыу комбинаты

**ДОМОТА́ТЬ** *сов. что* урап (сырмап) ҡуйыу; **домота́ть клубо́к** йомғаҡты урап ҡуйыу

**ДОМОТКА́НЫЙ,** -ая, -ое ҡулдан һуғылған; **домотка́ный пала́с** ҡулдан һуғылған балаҫ; **домотка́ное сукно́** ҡулдан һуғылған тула

**ДОМОУПРАВЛЕ́НИЕ** *с* йорт(тар) идараһы, йорт идаралығы; **зайти́ в домоуправле́ние** йорт идаралығына инеү

**ДОМОХОЗЯ́ИН** *м* йорт (өй) хужаһы

**ДОМОХОЗЯ́ЙКА** *ж* **1.** хужабикә **2.** балалар (йорт) ҡарап ултырған ҡатын-ҡыҙ (*бер ерҙә лә эшләмәгән*)

**ДОМОХОЗЯ́ЙСТВО** *с см.* **домоуправле́ние**

**ДОМОЧА́ДЦЫ** *обычно мн.* (*ед.* **домоча́дец** *м*); *уст.* өй эсе, ғаилә ағзалары

**ДОМРАБО́ТНИЦА** *ж* хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ

**ДОМЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* елдереп (осортоп) алып барып еткереү, елдереп (осортоп) килтереп ҡуйыу; **ло́шади домча́ли нас до дере́вни** аттар беҙҙе ауылға елдереп килтереп еткерҙе **2.** *см.* **домча́ться**

**ДОМЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* елдереп барып етеү; **бы́стро домча́ться** тиҙ елдереп барып етеү

**ДО́МЫСЕЛ** *м* фараз итеү, уйҙырма; **пусты́е до́мыслы** буш уйҙырмалар

**ДОМЫ́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **домы́слить**

**ДОМЫ́СЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **домы́сливать**

**ДОМЫ́СЛИТЬ** *сов. что* и *без доп.* уйлап еткереү (сығарыу), фараз итеп ҡуйыу

**ДОМЫШЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **домы́слить**

**ДОМЫШЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **домышля́ть**

**ДОНАГА́** *нареч.*; *разг.* шыр яланғас, инәнән тыума (яланғас)

**ДОНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **доноси́ть** I

**ДОНА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **доноси́ться** I; **2.** *страд. от* **дона́шивать**

**ДОНГ** *м* донг (*Вьетнам аҡса берәмеге*)

**ДОНЕ́ЛЬЗЯ** *нареч.*; *разг.* самаһыҙ, сикһеҙ, саманан (сиктән) тыш; **быть доне́льзя насто́йчивым** сикһеҙ ныҡыш булыу

**ДОНЕСЕ́НИЕ** *с* белдереү, хәбәр итеү (*һųҙ менән йә яҙма рәųештә*); **коро́ткое донесе́ние** ҡыҫҡа ғына белдереү яһау

**ДОНЕСТИ́ I** *сов.* **1.** *кого-что* алып барыу, килтереү, алып барып ҡуйыу (еткереү), килтереп еткереү; **донести́ во́время** ваҡытында алып барып еткереү **2.** (*о звуках, запахах*) ишеттереү, еткереү; **ве́тер донёс зву́ки вы́стрела** ел атыу тауыштарын ишеттерҙе

**ДОНЕСТИ́ II** *сов.* **1.** белдереү яһау, хәбәр итеү; **донести́ до команди́ра** командирға хәбәр итеү **2.** *на кого* и *без доп.* ошаҡлау, әләкләү, өҫтөнән һөйләү (яҙыу); **донести́ на невино́вного** ғәйепһеҙ кеше өҫтөнән һөйләү

**ДОНЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** ишетелеү, килеү; **донесли́сь раска́ты гро́ма** күк күкрәү тауышы ишетелде **2.** *перен.* (*дойти до сведения*) барып (килеп) етеү, хәбәр килеү (ишетелеү); **донёсся слух** хәбәр ишетелде

**ДОНЖУА́Н** *м* донжуан (*ҡатын-ҡыҙ артынан йөрөргә яратыусы*)

**ДО́НИЗУ** *нареч.* аҫҡа (түбәнгә) тиклем ♦ **све́рху до́низу** өҫтән аҫҡа тиклем

**ДОНИМА́ТЬ** *несов. см.* **доня́ть**

**ДОНКИХО́Т** *м* донкихот (*хыялый, диуана кеше*)

**ДОНКИХО́ТСТВО** *с* донкихотлыҡ

**ДО́ННИК** *м* ҡандала үләне; **бе́лый до́нник** аҡ ҡандала үләне; **лека́рственный до́нник** һары ҡандала үләне

**ДО́ННЫЙ,** -ая, -ое һыу төбө ...ы, һыу төбөндә йәшәүсе; **до́нные ры́бы** һыу төбөндә йәшәүсе балыҡтар

**ДО́НОР** *м* донор (*ҡан биреп тороусы*)

**ДО́НОРСКИЙ,** -ая, -ое донор ...ы, донорлыҡ ...ы; **до́норская кровь** донор ҡаны; **до́норский пункт** донорлыҡ пункты

**ДО́НОРСТВО** *с* донорлыҡ

**ДОНО́С** *м* донос, ошаҡ, яла

**ДОНОСИ́ТЕЛЬСТВО** *с* ошаҡ һөйләү, яла яғыу; **занима́ться доноси́тельством** ошаҡ һөйләп йөрөү

**ДОНОСИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* ташып бөтөрөү (бөтөрөп ҡуйыу); **доноси́ть дрова́ в се́ни** утынды соланға ташып бөтөрөү **2.** *что* кейеп туҙҙырыу (туҙҙырып бөтөрөү), туҙғансы кейеү; **доноси́ть ша́пку бра́та** ағайҙан ҡалған бүректе кейеп туҙҙырыу **3.** *кого* (*о ребёнке*) етлектереү, ваҡытына еткереү; **доноси́ть ребёнка** баланы етлектереп тыуҙырыу

**ДОНОСИ́ТЬ II** *несов. см.* **донести́** I

**ДОНОСИ́ТЬ III** *несов. см.* **донести́** II

**ДОНОСИ́ТЬСЯ I** *сов.* (*износиться*) туҙыу, ылбырап бөтөү (*кейем-һалым тураһында*)

**ДОНОСИ́ТЬСЯ II** *несов. см.* **донести́сь**

**ДОНО́СЧИК** *м* и **ДОНО́СЧИЦА** *ж* ошаҡсы, яла яғыусы, кеше өҫтөнән һөйләүсе

**ДОНЫ́НЕ** *нареч.*; *высок.* әлегәсә, хәҙергәсә, бөгөнгәсә, бөгөнгә тиклем (ҡәҙәре, саҡлы)

**ДОНЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* маҙаға тейеү, теңкәне ҡоротоу, аптыратып бөтөрөү; **доня́ть неуме́стными вопро́сами** *кого-л.* урынһыҙ һорауҙар менән маҙаһына тейеү

**ДООБЕ́ДЕННЫЙ,** -ая, -ое төшкө ашҡа тиклемге; **дообе́денное вре́мя** төшкө ашҡа тиклемге ваҡыт

**ДООКТЯ́БРЬСКИЙ,** -ая, -ое Октябрь революцияһына тиклемге, Октябрь революцияһына тиклем булған; **доокт́ябрьский пери́од** Октябрь революцияһына тиклемге дәүер

**ДОПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **допа́рить**

**ДОПА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **допа́риться 2.** *страд. от* **допа́ривать**

**ДОПА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* быҡтырып сығарыу (ҡуйыу) **2.** бешекләү, бешекләп ҡуйыу

**ДОПАХА́ТЬ** *сов. что* һөрөп бөтөрөп ҡуйыу, (ҡалғанды) һөрөп ҡуйыу

**ДОПА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **допаха́ть**

**ДОПЕВА́ТЬ** *несов. см.* **допе́ть**

**ДОПЕ́ТЬ** *сов. что* йырлап бөтөү (бөтөрөү, бөтөрөп ҡуйыу); **допе́ть пе́сню** йырҙы йырлап бөтөү

**ДОПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* **1.** (*кончить печатать*) баҫып бөтөү (бөтөрөү) **2.** өҫтәп баҫыу; **допеча́тать ещё де́сять страни́ц** йәнә ун бит өҫтәп баҫыу

**ДОПЕЧА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **допеча́тать**

**ДОПЕЧА́ТЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **допеча́тывать**

**ДОПЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что* (*окончить печь*) бешереп алыу, бөткәнсе бешереү; **допе́чь пирожки́** бөйөрәктәрҙе бешереп алыу **2.** *чего*; *разг.* (*испечь дополнительно*) өҫтәп бешереү, ҡыҙҙырыу **3.** *кого-что*; *перен.*, *прост.* сығырынан сығарыу, ахыр сиккә еткереү

**ДОПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* бешеү, бешеп сығыу; **пироги́ допекли́сь** бәлештәр бешеп сыҡты

**ДОПИВА́ТЬ** *несов. см.* **допи́ть**

**ДОПИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **допи́ться 2.** *страд. от* **допива́ть**

**ДО́ПИНГ** *м* допинг (*организмды яһалма көсәйтә торған дарыу, сара*)

**ДОПИСА́ТЬ** *сов. что* **1.** яҙып бөтөрөү (бөтөү); **дописа́ть письмо́** хатты яҙып бөтөрөү **2.** өҫтәп яҙыу (яҙып ҡуйыу); **дописа́ть ещё не́сколько слов** тағы бер нисә һүҙ өҫтәп ҡуйыу

**ДОПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **дописа́ть**

**ДОПИ́ТЬ** *сов. что* эсеп (бөтөү) бөтөрөү, (бөткәнсе) эсеп ҡуйыу; **допи́ть чай** сәй эсеп бөтөү

**ДОПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* эсеүҙең сигенә етеү ♦ **допи́ться до чёртиков** күҙенә ен-пәрей күренгәнсе (күҙе аларғансы) эсеү

**ДОПЛА́ТА** *ж* **1.** *см.* **доплати́ть — допла́чивать 2.** өҫтәмә түләү; **небольша́я допла́та** бер аҙ өҫтәмә түләү

**ДОПЛАТИ́ТЬ** *сов. что* түләп бөтөү, тулыһынса түләү, ҡалған өлөшөн түләү, өҫтәмә түләп ҡуйыу

**ДОПЛАТНО́Й,** -ая, -ое **1.** өҫтәмә түләү индерелә торған; **доплатна́я ка́сса** өҫтәмә түләү индерелә торған касса **2.** түләүле, түләп алына торған; **доплатно́е письмо́** түләп алына торған хат

**ДОПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **доплати́ть**

**ДОПЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **допла́чивать**

**ДОПЛЕСТИ́** *сов. что* (*косу*) үреп бөтөү; (*верёвку*) ишеп бөтөү; (*кружева*) бәйләп бөтөү

**ДОПЛЕСТИ́СЬ** *сов. до чего*; *разг.* көскә (көсхәлгә) барып (ҡайтып) етеү

**ДОПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **доплести́**

**ДОПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **доплы́ть**

**ДОПЛЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *до чего* йөҙөп барып (килеп) етеү; **доплы́ть до бе́рега** ярға йөҙөп килеп етеү **2.** *перен.* барып (килеп) етеү, ишетелеү; **доплы́ли зву́ки му́зыки** музыка тауышы килеп етте

**ДОПО́ДЛИННО** *нареч.*; *разг.* бик асыҡ, бик яҡшы; **нам э́то допо́длинно изве́стно** беҙгә был бик яҡшы билдәле

**ДОПО́ДЛИННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* дөрөҫ, ысын, раҫ; **допо́длинные све́дения** дөрөҫ мәғлүмәттәр

**ДОПОЗДНА́** *нареч.*; *разг.* төн уртаһы еткәнсе, төн уртаһына тиклем (хәтле), бик һуңлап; **проговори́ть допоздна́** төн уртаһы еткәнсе һөйләшеп ултырыу

**ДОПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **доползти́**

**ДОПОЛЗТИ́** *сов.* **1.** шыуышып (үрмәләп) барып (килеп) етеү; **змея́ доползла́ до норы́** йылан ояһына шыуышып барып етте **2.** *перен.*, *разг.* көскә-көскә (саҡ-саҡ, ауырлыҡ менән) килеп етеү; **авто́бус допо́лз до дере́вни** автобус ауылға саҡ-саҡ килеп етте

**ДОПОЛНА́** *нареч.*; *разг.* тултырғансы, тултыра; **нали́ть дополна́** тултырғансы һалыу

**ДОПОЛНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **допо́лнить — дополня́ть 2.** өҫтәмә, ҡушымта; **дополне́ние к резолю́ции** резолюцияға ҡушымта **3.** *грам.* тултырыусы; **прямо́е дополне́ние** тура тултырыусы; **ко́свенное дополне́ние** ситләтелгән тултырыусы ♦ **в дополне́ние** *к чему* -ға/-гә өҫтәп, өҫтәмә итеп

**ДОПО́ЛНЕННЫЙ,** -ая, -ое өҫтәлгән, тулыландырылған, арттырылған; **испра́вленное и допо́лненное изда́ние кни́ги** китаптың төҙәтелгән һәм тулыландырылған баҫмаһы

**ДОПОЛНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өҫтәмә; **дополни́тельная подпи́ска на газе́ты** гәзиттәргә өҫтәмә яҙылыу; **дополни́тельный о́тпуск** өҫтәмә ял **2.** *грам.* тултырыусы; **дополни́тельное прида́точное предложе́ние** тултырыусы эйәрсән һөйләм ♦ **дополни́тельные цвета́** *физ.* спектрҙың өҫтәмә төҫтәре

**ДОПО́ЛНИТЬ** *сов. что* өҫтәү, тултырыу, өҫтәп тултырыу, тулыландырыу; **допо́лнить самова́р** самауырға өҫтәү; **допо́лнить статью́** мәҡәләне тулыландырыу

**ДОПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **допо́лнить** ♦ **дополня́ть друг дру́га** иш менән ҡуш булыу, береһен-береһе тултырыу

**ДОПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **допо́лниться 2.** *страд. от* **дополня́ть**

**ДОПОЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **дополучи́ть**

**ДОПОЛУЧИ́ТЬ** *сов. что* алып бөтөрөү, алып бөтөрөп ҡуйыу; **дополучи́ть зарпла́ту** эш хаҡын алып бөтөрөү

**ДОПОТО́ПНЫЙ,** -ая, -ое *разг.*, *шутл.* бик боронғо, иҫке, иҫкереп бөткән, артта ҡалған, хан заманғы; **допото́пные взгля́ды** иҫке ҡараштар; **допото́пные спо́собы обрабо́тки земли́** бик боронғо ер эшкәртеү ысулы

**ДОПРА́ШИВАНИЕ** *с см.* **допра́шивать**

**ДОПРА́ШИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **допроси́ть 2.** *разг.* ентекләп һорашыу, төпсөнөү, һоранып төбөнә төшөү

**ДОПРИЗЫ́ВНИК** *м* допризывник (*хеҙмәткә саҡырылыуҙан алда башланғыс хәрби әҙерлек үтеүсе*)

**ДОПРИЗЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое хәрби хеҙмәткә саҡырылыуға тиклемге, хәрби хеҙмәт ...ы; **допризы́вный во́зраст** хәрби хеҙмәткә саҡырылыуға тиклемге йәше; **допризы́вная подгото́вка** хәрби хеҙмәткә саҡырылыуға тиклемге әҙерлек

**ДОПРО́С** *м* допрос, яуап алыу; **подверга́ть допро́су** допросҡа тарттырыу

**ДОПРОСИ́ТЬ** *сов. кого-что* һорау алыу; **допроси́ть свиде́телей** шаһиттарҙан һорау алыу

**ДОПРОСИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*обычно с отрицанием*) һорап (ялынып) ала алмау, һорап (ялынып) алып булмау; **де́нег у него́ никто́ не допро́сится** бирәү ҙә унан аҡса һорап ала алмай

**ДОПРЫ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һикерәңләй торғас бәләгә тарығыу, үҙ башына һикерәңләү

**ДОПРЫ́ГНУТЬ** *сов.* һикереп (ырғып) барып етеү (төшөү); **соба́ка допры́гнула до забо́ра** эт ҡоймаға тиклем ырғыны

**ДО́ПУСК** *м* **1.** (*право входа, доступа*) (инеүгә, кереүгә) рөхсәт; **име́ть до́пуск к больно́му** ауырыуға инергә рөхсәт булыу **2.** *тех.* тайпылыш сиге (*деталдәрҙең нормаға бер аҙ тап килмәүе*)

**ДОПУСКА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что*, *к чему* (*позволять, разрешать*) инергә (керергә) рөхсәт итеү, индереү, ҡатнашырға мөмкинлек биреү; **допуска́ть посети́теля к больно́му** ауырыу эргәһенә килгән кешене индереү; **допуска́ть к экза́менам** имтихандарҙа ҡатнашырға рөхсәт итеү **2.** *что* и *с неопр.* ирек биреү, юл ҡуйыу; **нельзя́ э́того допуска́ть** быға юл ҡуйырға ярамай; **не допуска́ть (и) мы́сли** ундай уйҙы башҡа ла килтермәү, ул турала уйларға ла ярамау **3.** *что* (*предполагать, считать возможным*) фараз итеү; **допуска́ть, что в жи́зни произойду́т переме́ны** тормошта үҙгәрештәр булырын фараз итеү **4.** *что* ебәреү, яһау; **допуска́ть оши́бку** хата ебәреү

**ДОПУСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** рөхсәт ителеү (бирелеү), ебәрелеү, индерелеү; **де́ти до шестна́дцати лет не допуска́ются** ун алты йәшкә тиклемге балаларға рөхсәт ителмәй **2.** *страд. от* **допу-**

**ска́ть**; **гру́бости не допуска́лись** тупаҫлыҡҡа ирек ҡуйылмай ине

**ДОПУСТИ́МЫЙ,** -ая, -ое рөхсәт ителә торған, (мөмкин) була торған; **допусти́мые нето́чности** була торған етешһеҙлектәр

**ДОПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **допуска́ть 2.** *в знач. вводн. сл.* **допу́стим** әйтәйек, ти, фараз итәйек, ти; **допу́стим, что э́то так** шулай ҙа булһын, ти; шулай тип әйтәйек, ти

**ДОПУЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **допуска́ть** 1; **допуще́ние к экза́менам** имтихандарға (инергә) рөхсәт **2.** фараз

**ДОПЫТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һорашып (соҡсоноп, төпсөнөп) белеү; **я допыта́лся, где он был** уның ҡайҙа булғанын мин төпсөнөп белдем

**ДОПЫ́ТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **допыта́ться**

**ДОПЬЯНА́** и **ДО́ПЬЯНА** *нареч.*; *разг.* иҫергәнсе, иҫерткәнсе, лаяҡыл булғансы; **пои́ть допьяна́** иҫергәнсе эсереү

**ДОРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **дорабо́тать**

**ДОРАБА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **дорабо́таться 2.** *страд. от* **дораба́тывать**

**ДОРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** эшләп бөтөү; **дорабо́тать прое́кт** проектты эшләп бөтөү **2.** *перен.* эшкәртеү; **дорабо́тать пье́су** пьесаны эшкәртеү

**ДОРАБО́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* хәлдән тайғансы эшләү

**ДОРАБО́ТКА** *ж см.* **дорабо́тать** — **дораба́тывать**

**ДОРАССВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое таң алдындағы, таң алды ...ы; **дорассве́тный хо́лод** таң алдындағы һалҡын

**ДОРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **дорасти́**

**ДОРАСТИ́** *сов.* үҫеү, үҫеп етеү; **де́рево доросло́ до кры́ши до́ма** ағас өй ҡыйығына тиклем үҫеп етте ♦ **нос не доро́с** *шутл.* танау аҫты кипмәгән, хәленән килерлек түгел

**ДОРАСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* берәй сиккә (ваҡытҡа) тиклем үҫтереү; **дорасти́ть до семна́дцати лет** ун ете йәшкә тиклем үҫтереү

**ДОРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **дорасти́ть**

**ДОРВА́ТЬ** *сов. что* **1.** йыртып бөтөрөү, йыртҡыслау **2.** *разг.* кейеп туҙҙырыу; **дорва́ть сапоги́** итекте кейеп туҙҙырыу

**ДОРВА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* йомолоу, ябырылыу, ташланыу; **ребя́та дорвали́сь до горя́чей пи́щи** балалар ҡайнар ашҡа ябырылды

**ДОРЕВОЛЮЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое революцияға тиклемге (хәтлемге); **дореволюцио́нная дере́вня** революцияға тиклемге ауыл

**ДОРЕФО́РМЕННЫЙ,** -ая, -ое реформаға тиклемге, реформаға хәтлем булған

**ДОРИСОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (һүрәтте) төшөрөп, эшләп бөтөрөү; **дорисова́ть портре́т** портретты эшләп бөтөрөү **2.** *перен.* (образды) һынландырыу; **дорисова́ть дета́ли о́браза** образдың ваҡ һыҙаттарын һынландырыу

**ДОРО́ГА** *ж* **1.** *в разн. знач.* юл; **желе́зная доро́га** тимер юл; **просёлочная доро́га** ауыл (баҫыу) юлы; **шоссе́йная доро́га** шоссе юл; **больша́я доро́га** оло юл; **то́рная доро́га** таҡыр юл; **столбова́я доро́га** *уст.* маяҡлы юл, бағаналы (саҡрымлы) юл; **уха́бистая доро́га** урғылйын (һикәлтәле) юл; **вы́йти на доро́гу** юлға сығыу (сығып тороу); **сби́ться с доро́ги** юлдан яҙыу, аҙашыу; **доро́гу!** юл бирегеҙ! **2.** (*путешествие*) юл, сәфәр; **отправля́ться в доро́гу** юлға (сәфәр) сығыу; **написа́ть письмо́ с доро́ги** юлдан хат яҙыу **3.** *перен.* (*средство*) юл, сара; **упо́рный труд — доро́га к успе́ху** ныҡышмалы хеҙмәт — уңышҡа ирешеү сараһы ♦ **дать (уступи́ть) доро́гу** юл биреү, ҡамасауламау; **идти́ свое́й доро́гой** үҙ юлынан (үҙ юлы менән) китеү; **перебежа́ть доро́гу** юлына арҡыры сығыу; **пойти́ по плохо́й доро́ге** насар юлға баҫыу; **проби́ть себе́ доро́гу** үҙ-үҙенә юл ярыу; **ска́тертью доро́га!** ана бара юлың!; **стать (встать, стоя́ть) поперёк доро́ги** юлға арҡыры төшөү, юлында кәртә булып тороу; **на доро́ге не валя́ется** юлда ятмай (*табыуы анһат түгел*); **туда́ (ему) и доро́га** шул кәрәк, яҡшы булған

**ДО́РОГО** *нареч.* **1.** ҡыйбат, ҡиммәт; **до́рого заплати́ть** ҡыйбат түләү; **до́рого сто́ит** ҡиммәт тора **2.** *перен.* (*ценой больших усилий*) ҡыйбатҡа, ҡиммәткә, ауырға; **успе́х ему́ до́рого доста́лся** уңыш уға бик ҡыйбатҡа төштө ♦ **до́рого бы дал (заплати́л)** әллә ниҙәр бирер инем (*ҙур теләк белдергәндә*)

**ДОРОГОВИ́ЗНА** *ж* ҡыйбатсылыҡ, ҡиммәтселек; **страда́ть от дорогови́зны** ҡиммәтселектән ыҙаланыу

**ДОРО́ГОЙ** *нареч.* юлда, юл ыңғайында, юлда барғанда; **договори́ться доро́гой** юл ыңғайында килешеү

**ДОРОГО́Й,** -ая, -ое **1.** (*дорогостоящий*) ҡиммәтле, ҡыйбатлы; **дороги́е ве́щи** ҡиммәтле әйберҙәр **2.** *перен.* (*ценный*) ҡиммәт, яҡын; **нам дорога́ па́мять о геро́ях** беҙгә батырҙарҙың иҫтәлеге ҡиммәт **3.** (*любимый*) ғәзиз, ҡәҙерле; **дорого́й друг** ҡәҙерле дуҫ; **мой дорого́й сын** минең ғәзиз улым **4.** *в знач. сущ.* **дорого́й** *м* и **дорога́я** *ж* һөйөклө, ҡәҙерле ♦ **дорого́й ценой** күп ҡорбандар биреп, күп көс түгеп (*ниҙер эшләү*)

**ДОРО́ДНОСТЬ** *ж* тулы кәүҙәлелек, тулылыҡ, таҙалыҡ

**ДОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое таҙа, тулы, йыуан (кәүҙәле); **доро́дная же́нщина** тулы кәүҙәле ҡатын

**ДОРО́ДСТВО** *с* таҙалыҡ, тулы кәүҙәлелек, кәүҙә таҙалығы (мыҡтылығы)

**ДОРОЖА́ТЬ** *несов.* ҡыйбатланыу, ҡиммәтләнеү, хаҡы артыу (күтәрелеү); **проду́кты дорожа́ют** аҙыҡ-түлек ҡиммәтләнә

**ДОРОЖИ́ТЬ** *несов. кем-чем* ҡәҙерләү, ҡәҙерен белеү, иҫәпкә алыу; **дорожи́ть мне́нием дру́га** дуҫтың фекере менән иҫәпләшеү; **дорожи́ть**

**сво́им и́менем** үҙ ҡәҙереңде ебәрмәү, үҙ баһаңды төшөрмәү (һаҡлау)

**ДОРО́ЖКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **доро́га** **2.** (*узкая дорога*) һуҡмаҡ юл, берләм юл **3.** (*узкий, длинный коврик, половик*) иҙән балаҫы ♦ **встре́титься (столкну́ться) на у́зкой доро́жке** ҡара-ҡаршы осрашыу, тар һуҡмаҡта осрашыу (*үсле кешеләргә ҡарата*); **по проторённой доро́жке** (йөрөп) өйрәнгән юлдан

**ДОРО́ЖНИК** *м* юлсы, юл төҙөүсе

**ДОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое юл ...ы, юлдағы, юлда булған; **доро́жное строи́тельство** юл(дар) төҙөлөшө; **доро́жные приключе́ния** юлда булған мажаралар; **доро́жный костю́м** юл костюмы; **доро́жный ма́стер** юл мастеры

**ДОРСА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *мед.* дорсаль (*һырт яҡҡа ҡағылышлы*)

**ДОРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **дорва́ть**

**ДОРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **доры́ть**

**ДОРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **дорва́ться** **2.** *страд. от* **дорыва́ть** I

**ДОРЫВА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **доры́ться** **2.** *страд. от* **дорыва́ть** II

**ДОРЫ́ТЬ** *сов. что* ҡаҙып бөтөү (ҡуйыу); **доры́ть кана́ву** канауҙы ҡаҙып бөтөү

**ДОРЫ́ТЬСЯ** *сов.* ҡаҙып ташлау, ҡаҙып барып етеү; **доры́ться до грунтовы́х вод** ер аҫты һыуҙарына хәтле ҡаҙып барып етеү

**ДОСА́ДА** *ж* **1.** ғәрлек, асыу, йән көйөү; **пла́кать с доса́ды** ғәрлектән илау **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* (*неприятность*) йән көйөү, үкенес; **кака́я доса́да!** ниндәй үкенес!

**ДОСАДИ́ТЬ** *сов. кому* ғәрләндереү, йәнен көйҙөрөү, асыуын килтереү; **досади́ть дру́гу** дуҫтың йәнен көйҙөрөү

**ДОСА́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое үкенесле, ғәрләнгес, йән көйҙөргөс; **доса́дливое чу́вство** йән көйҙөргөс тойғо

**ДОСА́ДНЫЙ,** -ая, -ое үкендергес, йән көйҙөргөс, ғәрләндергес; **доса́дная оши́бка** үкендергес хата; **доса́дное чу́вство вины́** ғәрләндергес ғәйеп тойғоһо

**ДОСА́ДОВАТЬ** *несов. на кого-что* асыу килеү, үкенеү, йән көйөү; **доса́довать на свою́ невнима́тельность** үҙеңдең иғтибарһыҙлығыңа йән көйөү

**ДОСАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **досади́ть**

**ДОСЕ́ЯТЬ** *сов. что* **1.** (*окончить сев*) сәсеп бөтөү (бөтөрөп ҡуйыу); **досе́ять про́со** тары сәсеп бөтөү **2.** (*окончить просеивание*) иләп бөтөү (бөтөрөп ҡуйыу); **досе́ять муку́** ондо иләп бөтөү

**ДОСИДЕ́ТЬ** *сов.* -ғансы/-гәнсе ултырыу, саҡлы (тиклем) ултырыу; **досиде́ть до конца́ собра́ния** йыйылыштың аҙағына саҡлы ултырыу

**ДОСИ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **досиде́ть**

**ДО́СИНЯ** *нареч.* күкһелле, күкһелләнгәнсе, күгәргәнсе; **до́синя бле́дное лицо́** күкһелләнеп ағарынған йөҙ

**ДОСКА́** *ж*; *в разн. знач.* таҡта; **дубо́вые до́ски** имән таҡталар; **кла́ссная доска́** класс таҡтаһы; **чертёжная доска́** һыҙыу таҡтаһы; **ша́хматная доска́** шахмат таҡтаһы; **мемориа́льная доска́** мемориаль таҡта; **Доска́ почёта** Почёт таҡтаһы ♦ **до гробово́й доски́** гүргә ингәнсе; **от доски́ до доски́ (чита́ть)** башынан аҙағынаса (уҡыу), өйрәнеү; **стать (встать) на одну́ до́ску** *с кем* кемдеңдер рәтенә баҫыу (кеүек булыу)

**ДОСКАЗА́ТЬ** *сов. что* әйтеп (һөйләп) бөтөрөү (бөтөү); **досказа́ть свою́ мысль** үҙ фекереңде әйтеп бөтөү; **досказа́ть ска́зки** әкиәтте һөйләп бөтөрөү

**ДОСКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **досказа́ть**

**ДОСКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **доска́зывать**

**ДОСКАКА́ТЬ** *сов.* саптырып (сабып) барып (килеп) етеү; **доскака́ть до ста́нции** станцияға сабып барып етеү

**ДОСКОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ентекле, тәфсирле, төплө; **доскона́льный разбо́р де́ла** эште ентекле тикшереү; **доскона́льное иссле́дование** төплө тикшеренеү

**ДОСЛА́ТЬ** *сов. что* **1.** өҫтәп ебәреү, ҡалғанын ебәреү **2.** *воен.* шыуҙырып (индереп, төртөп) еткереү; **досла́ть патро́н в патро́нник** патронды патронникка индереп еткереү

**ДОСЛЕ́ДОВАНИЕ** *с см.* **досле́довать**; **напра́вить де́ло на досле́дование** эште ҡабаттан тикшерергә ебәреү

**ДОСЛЕ́ДОВАТЬ** *сов. что* ҡабаттан (яңынан) тикшереү

**ДОСЛО́ВНОСТЬ** *ж* һүҙмә-һүҙ булыу, дөрөҫ (аныҡ) булыу

**ДОСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое һүҙмә-һүҙ, дөрөҫ, аныҡ; **досло́вный перево́д** һүҙмә-һүҙ тәржемә

**ДОСЛУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **дослужи́ть**

**ДОСЛУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **дослужи́ться**

**ДОСЛУЖИ́ТЬ** *сов.* -ға/-гә тиклем, -сы/-се хеҙмәт итеү (эшләү); **дослужи́ть до оконча́ния сро́ка** срогы бөткәнгә тиклем хеҙмәт итеү; **дослужи́ть до пе́нсии** пенсияға сыҡҡансы эшләү

**ДОСЛУЖИ́ТЬСЯ** *сов. до чего* хеҙмәт итеп (эшләп) ирешеү, дәрәжәһенә етеү; **дослужи́ться до капита́на** капитан дәрәжәһенә етеү

**ДОСЛУ́ШАТЬ** *сов. кого-что* тыңлап бөтөү, бөткәнсе тыңлау; **дослу́шать му́зыку** музыканы тыңлап бөтөү; **дослу́шать това́рища** иптәште тыңлап бөтөү

**ДОСЛУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **дослу́шать**

**ДОСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **досмотре́ть**

**ДОСМО́ТР** *м*; *спец.* **1.** *см.* **досмотре́ть** **2.** *спец.* тикшереү; **тамо́женный досмо́тр** таможня тикшереүе

**ДОСМОТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡарап бөтөрөү (сығыу), ҡарап бөтөү, бөткәнсе ҡарау; **досмотре́ть спекта́кль** спектаклде ҡарап бөтөрөү **2.** *за кем-чем* (*также с отрицанием*) күрмәй ҡалыу,

ҡарап тороу, ҡарап еткермәү; **я не досмотре́л за ребёнком** мин баланы күрмәй ҡалғанмын **3.** *что*; *спец.* (*произвести досмотр*) тикшереү; **досмотре́ть бага́ж** багажды тикшереп бөтөү

**ДОСМО́ТРЩИК** *м* тикшереүсе, тикшереп тороусы

**ДОСОВЕ́ТСКИЙ,** -ая, -ое советҡа (советтарға) тиклемге, совет власына тиклем булған; **досове́тский пери́од** совет власына тиклемге дәүер

**ДОСО́ХНУТЬ** *сов.* кибеп сығыу (бөтөү), ҡороу

**ДОСПА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *до чего* -ға/-гә ҡәҙәр (тиклем) йоҡлау; **доспа́ть до восьми́ часо́в утра́** иртәнге һигеҙгә ҡәҙәр йоҡлау **2.** йоҡлап үткәреү; **доспа́ть ночь споко́йно** төндө тыныс йоҡлап үткәреү

**ДОСПЕ́ХИ** *мн.* (*ед.* **доспе́х** *м*) **1.** боронғо хәрби кейем һәм ҡоралдар; **ры́царские доспе́хи** рыцарь кейеме һәм ҡоралдары **2.** *шутл.*, *ирон.* кейем һәм ҡорал-ҡорамалдар (*һунар кейеме һәм кәрәк-ярағы*)

**ДОСРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ваҡытынан алда (элек), срогынан алда; **досро́чное выполне́ние зада́ния** бирелгән эште ваҡытынан алда үтәү; **досро́чная сда́ча экза́мена** имтиханды срогынан алда тапшырыу

**ДОСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **доста́ть**

**ДОСТАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **доста́ться 2.** *страд. от* **достава́ть**

**ДОСТА́ВИТЬ** *сов. кого-что* **1.** килтереү, алып килеү, килтереп китеү (еткереү); **доста́вить груз на парохо́д** йөктө пароходҡа алып килеү; **доста́вить люде́й к ме́сту назначе́ния** кешеләрҙе тәғәйенләнгән урынға килтереү **2.** *что* (*причинять, вызвать*) тыуҙырыу, килтереү; **доста́вить удово́льствие де́тям** балаларға шатлыҡ килтереү, балаларҙы кинәндереү; **доста́вить мно́го хлопо́т** күп мәшәҡәт тыуҙырыу; **доста́вить мно́го тру́дностей** күп ҡыйынлыҡтар тыуҙырыу

**ДОСТА́ВКА** *ж см.* **доста́вить** 1 — **доставля́ть**; **доста́вка газе́т и журна́лов** гәзит һәм журнал килтереү

**ДОСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **доста́вить**

**ДОСТА́ВЩИК** *м* и **ДОСТА́ВЩИЦА** *ж* килтереүсе, ташыусы

**ДОСТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **достоя́ть**

**ДОСТА́ТОК** *м* **1.** муллыҡ, етеш(лек); **жить в доста́тке** муллыҡта йәшәү; **семья́ с доста́тком** етеш ғаилә **2.** *мн.* **доста́тки**; *разг.* байлыҡ, мөлкәт; **небольши́е доста́тки** аҙ-маҙ байлыҡ (мөлкәт)

**ДОСТА́ТОЧНО 1.** *нареч.* (*в значительной степени*) шаҡтай, етерлек; **доста́точно умён** шаҡтай аҡыллы **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* булды, етте, етер; **доста́точно, бо́льше не ну́жно** булды, бүтән кәрәкмәй

**ДОСТА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое етерлек, еткелек, кәрәк хәтле; **доста́точный запа́с проду́ктов** етерлек ашамлыҡ запасы; **доста́точный срок хране́ния** һаҡлауға етерлек ваҡыт; **доста́точное основа́ние** етерлек нигеҙ

**ДОСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ынтылып алыу, сығарыу; **доста́ть кни́гу с по́лки** кәштәнән китапты ынтылып алыу; **доста́ть плато́чек из су́мки** сумканан ҡулъяулыҡ сығарыу **2.** *что* алыу, табыу; **э́ту кни́гу тру́дно доста́ть** был китапты табыуы ҡыйын **3.** *до чего*, *чем* буй етеү, тейеү; **доста́ть рука́ми до потолка́** түшәмгә буй етеү ♦ **руко́й не доста́ть** *кого* ҡул етмәҫлек (*дәрәжәле булып, кешене танымау*)

**ДОСТА́ТЬСЯ** *сов. кому* **1.** ҡалыу, тейеү; **ему́ доста́лась библиоте́ка бра́та** уға ағаһының китапханаһы ҡалды **2.** *безл.*; *разг.* эләгеү; **ему́ доста́нется от ма́мы** уға әсәһенән эләгәсәк

**ДОСТИГА́ТЬ** *несов. см.* **дости́чь**

**ДОСТИ́ГНУТЬ** *сов. см.* **дости́чь**

**ДОСТИЖЕ́НИЕ** *с* ҡаҙаныш, уңыш; **достиже́ния нау́ки** фән ҡаҙаныштары

**ДОСТИЖИ́МОСТЬ** *ж* ирешеү (өлгәшеү) мөмкинлеге; **достижи́мость це́ли** маҡсатҡа ирешеү мөмкинлеге

**ДОСТИЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое ирешерлек, өлгәшерлек, ирешә (өлгәшә) алырлыҡ, ирешергә (өлгәшергә) мөмкин булған; **достижи́мые зада́чи** өлгәшә алырлыҡ бурыстар

**ДОСТИ́ЧЬ** и **ДОСТИ́ГНУТЬ** *сов. чего*, *до чего* **1.** барып (килеп) етеү; **они́ дости́гли бе́рега** улар ярға барып етте **2.** ирешеү, өлгәшеү, ҡаҙаныу; **дости́чь высо́ких успе́хов в рабо́те** эштә юғары уңыштарға ирешеү **3.** етеү, булыу; **моро́з дости́г пяти́десяти гра́дусов** һалҡынлыҡ илле градусҡа етте **4.** (*дожить*) йәшәү, тороу, етеү; **дости́чь совершенноле́тия** үҫеп етеү, балиғ булыу; **дости́гнуть глубо́кой ста́рости** ныҡ ҡартайғансы йәшәү

**ДОСТОВЕ́РНОСТЬ** *ж* дөрөҫлөк, ысынлыҡ, хәҡиҡәт; **достове́рность фа́ктов** факттарҙың дөрөҫлөгө; **прове́рить достове́рность све́дений** мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн тикшереү

**ДОСТОВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое дөрөҫ, ысын, хаҡ, ышаныслы, шикһеҙ; **изве́стно из достове́рных исто́чников** ышаныслы сығанаҡтарҙан билдәле

**ДОСТО́ИНСТВО** *с* **1.** (*сознание своей значимости*) абруй, дәрәжә, бәҫ; **челове́ческое досто́инство** кешелек дәрәжәһе; **держа́ться с досто́инством** үҙеңде дәрәжәле тотоу; **бере́чь своё досто́инство** үҙ дәрәжәңде төшөрмәү, абруйыңды һаҡлау; **роня́ть своё досто́инство** үҙ дәрәжәңде (абруйыңды, бәҫеңде) төшөрөү **2.** (*положительные качества*) яҡшы яҡ (сифат), дәрәжә; **досто́инства и недоста́тки кни́ги** китаптың яҡшы яҡтары һәм етешһеҙлектәре **3.** (*стоимость*) -лыҡ/-лек; **облига́ция досто́инством в сто рубле́й** йөҙ һумлыҡ облигация ♦ **оцени́ть по досто́инству** тейешенсә баһалау, дәрәжәһенә ҡарап баһа биреү

**ДОСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*заслуживающий чего-л.*) лайыҡ, лайыҡ булырлыҡ; **досто́йный похвалы́** маҡтауға лайыҡ; **о́пыт, досто́йный подража́ния** үрнәк булырлыҡ тәжрибә **2.** (*справедливый*) лайыҡлы, урынлы; **досто́йная оце́нка карти́ны** һүрәтте лайыҡлы баһалау; **досто́йная ка́ра** урынлы яза **3.** *уст.* (*почтенный*) хөрмәткә лайыҡ, хөрмәтле, арҙаҡлы; **досто́йный челове́к** хөрмәткә лайыҡ кеше

**ДОСТОПОЧТЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* хөрмәтле, ҡәҙерле; **достопочте́нный челове́к** хөрмәтле кеше

**ДОСТОПРИМЕЧА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* күренекле (иҫтәлекле) урын, иҫтәлекле нәмә; **достопримеча́тельности Уфы́** Өфөнөң иҫтәлекле урындары

**ДОСТОПРИМЕЧА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күренекле, иҫтәлекле; **достопримеча́тельные места́** иҫтәлекле урындар

**ДОСТОЯ́НИЕ** *с* **1.** мөлкәт, милек, байлыҡ; **земля́ — всенаро́дное достоя́ние** ер — бөтә халыҡ милке **2.** *перен.* ҡаҙаныш

**ДОСТОЯ́ТЬ** *сов.* *что* -ға/-гә тиклем тороу; **достоя́ть до конца́** аҙағына тиклем тороу

**ДОСТРА́ИВАТЬ** *несов.* *см.* **достро́ить**

**ДОСТРО́ИТЬ** *сов.* *что* һалып бөтөү, төҙөп (ҡороп) бөтөрөү; **достро́ить дом** өйҙө һалып бөтөү

**ДОСТРО́ЙКА** *ж* *см.* **достро́ить — достра́ивать**

**ДО́СТУП** *м* **1.** юл, инеү (кереү) юлы; **к кре́пости нет до́ступа** ҡәлғәгә инеү юлы юҡ **2.** (*допуск*) рөхсәт, инеү мөмкинлеге; **получи́ть до́ступ к секре́тным докуме́нтам** йәшерен документтарға рөхсәт алыу **3.** (*проникание*) инеү (кереү); **до́ступ све́жего во́здуха в помеще́ние** бинаға саф һауа инеү

**ДОСТУ́ПНОСТЬ** *ж* **1.** үтерлек (йөрөрлөк) булыу; **досту́пность прохо́да в го́ры** юлдың тауға үтерлек булыуы **2.** аңлайышлылыҡ, аңлайышлы булыу; **досту́пность изложе́ния** яҙғандың (һөйләгәндең) аңлайышлы булыуы **3.** түбәнселек, түбәнселекле булыу **4.** арзанлыҡ, арзан булыу; **досту́пность цен** хаҡтарҙың арзан булыуы

**ДОСТУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үтерлек, йөрөрлөк, керерлек, үтә (йөрөй, керә) алырлыҡ; **тропи́нка досту́пна то́лько для пешехо́дов** һуҡмаҡ тик йәйәүлеләр үтә алырлыҡ ҡына **2.** (*понятный*) анһат, аңлайышлы, төшөнөрлөк; **досту́пная кни́га** аңлайышлы китап **3.** (*о ценах*) осһоҙ, арзан, һәр кем алырлыҡ; **досту́пные це́ны** һәр кем алырлыҡ хаҡ **4.** (*открытый, простой*) асыҡ, алсаҡ, ябай; **досту́пный всем челове́к** бөтә кеше өсөн алсаҡ кеше ♦ **досту́пный зре́нию (гла́зу)** күҙ күреме етерлек

**ДОСТУЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шаҡып (ишек) астырыу; **достуча́ться к сосе́дям** күршеләрҙең ишеген шаҡып астырыу

**ДОСУ́Г** *м* буш ваҡыт, ял ♦ **часы́ досу́га** ял сәғәттәре; **на досу́ге** буш ваҡытта, ваҡыт барҙа

**ДОСУ́ЖИЙ,** -ая, -ее *разг.* **1.** буш, эшһеҙ; **досу́жее вре́мя** буш ваҡыт **2.** юҡ-бар, буш; **досу́жие измышле́ния** уйҙырмалар; **досу́жие то́лки** юҡ-бар һүҙ

**ДО́СУХА** *нареч.* кипкәнсе, кибеп бөткәнсе, киптергәнсе, ҡороҡансы, ҡоп-ҡоро булғансы

**ДОСУ́ШИВАТЬ** *несов.* *см.* **досуши́ть**

**ДОСУШИ́ТЬ** *сов.* *что* киптереп бөтөү, өҫтәп киптереү; **досуши́ть мо́крое бельё** еүеш керҙе киптереп бөтөү; **досуши́ть ещё сухаре́й** тағы ла шөкәрә өҫтәп киптереү

**ДОСЧИТА́ТЬ** *сов.* *что* **1.** (*до какого-л. числа*) һанау, иҫәпләү; **досчита́ть до ты́сячи** меңгә хәтле һанау **2.** (*окончить считать*) һанап (иҫәпләп) сығыу (бөтөү); **досчита́ть нали́чные де́ньги** булған аҡсаны һанап сығыу

**ДОСЧИТА́ТЬСЯ** *сов.* *кого-чего* **1.** иҫәбенә сығыу, иҫәпләп табыу **2.** (*с отрицанием*) етмәү, кәм сығыу; **не досчита́ться пяти́ рубле́й** биш һумға кәм сығыу

**ДОСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов.* *см.* **досчита́ть**

**ДОСЧИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **досчита́ться 2.** *страд.* *от* **досчи́тывать**

**ДОСЫЛА́ТЬ** *несов.* *см.* **досла́ть**

**ДОСЫ́ПАТЬ** *сов.* *что, чего* тултырғансы (өҫтәп) һалыу (ҡойоу), еткергәнсе һалыу (ҡойоу); **досы́пать мешо́к** тоҡҡа тултырғансы һалыу

**ДОСЫПА́ТЬ I** *несов.* *см.* **досы́пать**

**ДОСЫПА́ТЬ II** *несов.* *см.* **доспа́ть**

**ДО́СЫТА** и **ДОСЫ́ТА** *нареч.*; *прям.*, *перен.* туйғансы, күңел булғансы; **накорми́ть до́сыта** туйғансы ашатыу; **наговори́ться до́сыта** күңел булғансы һөйләшеү

**ДОСЫХА́ТЬ** *несов.* *см.* **досо́хнуть**

**ДОСЬЕ́** *с нескл.*; *спец.* досье (*берәй эш буйынса тупланған документтар һәм шул документтар һалынған папка*)

**ДОСЮ́ДА** *нареч.*; *разг.* бында хәтле (тиклем), шунда тиклем, ошонда тиклем; **прочита́ть досю́да** ошонда хәтле уҡыу

**ДОТ** *м*; *воен.* дот (*оҙаҡ ваҡытҡа иҫәпләнгән, бик ныҡ нығытылған ут нөктәһе*)

**ДОТА́ЦИЯ** *ж* дотация (*предприятиеларға, йәмәғәт ойошмаларына сығымдарын ҡаплау өсөн дәүләт тарафынан бирелә торған өҫтәмә аҡса*)

**ДОТАЩИ́ТЬ** *сов.* *кого-что* һөйрәп (тартып) килтереп еткереү; **дотащи́ть ло́дку до воды́** кәмәне һыуға тиклем һөйрәп килтереп еткереү

**ДОТАЩИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һөйрәлеп барып (ҡайтып, килеп) етеү, көс-хәлгә (саҡ) барып (килеп, ҡайтып) етеү

**ДОТЕМНА́** *нареч.* ҡараңғы төшкәнгәсә (төшкәнсе); **пропада́ть дотемна́** ҡараңғы төшкәнгәсә юғалып йөрөү

**ДОТЛА́** *нареч.* бөтөнләй, бөткәнсе, бер нәмәһеҙ ҡалғансы, бер нәмәһен ҡалдырмай; **сгоре́ть**

**дотла́** бөткәнсе яныу; **разори́ть дотла́** бөтөнләй бөлдөрөү, бер нәмәһеҙ ҡалдырыу

**ДОТО́ШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* соҡсонғос, төпсөнгөс, ныҡыш, соҡсоноусан, төпсөнөүсән

**ДОТРА́ГИВАТЬСЯ** *несов. см.* **дотро́нуться**

**ДОТРО́НУТЬСЯ** *сов. до кого-чего* ҡағылыу, тейеү, тотоноу; **дотро́нуться руко́й до горя́чей пе́чи** ҡул менән эҫе мейескә тейеү

**ДОТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **дотяну́ть**

**ДОТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **дотяну́ться 2.** *страд. от* **дотя́гивать**

**ДОТЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тартып (килтереп) еткереү; **дотяну́ть ло́дку до бе́рега** кәмәне ярға тартып килтереп еткереү **2.** *что* и *без доп.* килтереп еткереү, килеп етеү; **дотяну́ть самолёт до аэродро́ма** самолётты аэродромға килтереп еткереү **3.** *что, до чего*; *прям., перен.* һуҙыу, һуҙып еткереү; **дотяну́ть ру́ку до потолка́** ҡулды түшәмгә еткереү **4.** *до чего* и *без доп.*; *разг.* үткәреү, һуҙыу, йәшәй алыу; **дотяну́ть вре́мя до обе́да** төшкө ашҡа хәтле (тиклем) ваҡыт үткәреү; **больно́й дотяну́л до весны́** ауырыу яҙға хәтле йәшәй алды **5.** *до чего* еткереү, һуҙып еткереү; **дотяну́ть де́ньги до зарпла́ты** аҡсаны хеҙмәт хаҡы алғанға хәтле еткереү

**ДОТЯНУ́ТЬСЯ** *сов. до чего* **1.** һуҙылыу, үрелеү, һуҙылып (үрелеп) етеү, буй (ҡул) етеү; **дотяну́ться до потолка́** үрелеп түшәмгә етеү **2.** *разг.* (*медленно дойти, достичь*) саҡ-саҡ (көс-хәлгә) барып (килеп, ҡайтып) етеү

**ДОУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **доучи́ть**

**ДОУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **доучи́ться 2.** *страд. от* **доу́чивать**

**ДОУЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* уҡытып (өйрәтеп) еткереү, -ғансы/-гәнсе уҡытыу (өйрәтеү), -ға/-гә тикле (ҡәҙәр) уҡытыу (өйрәтеү); **доучи́ть ребёнка до оконча́ния деся́того кла́сса** баланы унынсы синыфты бөткәнсе уҡытыу **2.** *что* өйрәнеү, ятлау, өйрәнеп (ятлап) бөтөү; **доучи́ть табли́цу умноже́ния** ҡабатлау таблицаһын ятлап бөтөү

**ДОУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*закончить обучение*) уҡып (өйрәнеп) бөтө(рө)ү, уҡыуҙы (өйрәнеүҙе) тамамлау **2.** (*до какого срока*) -ғансы/-гәнсе уҡыу, -ға/-гә тиклем (ҡәҙәр, саҡлы) уҡыу; **доучи́ться до тре́тьего ку́рса** өсөнсө курсҡа тиклем уҡыу

**ДОХА́** *ж* доха (*эсе-тышы тиреле тун*)

**ДОХА́ЖИВАТЬ** *несов.* (*о беременной женщине*) бәпеслəгәнсе йөрөү

**ДО́ХЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о животных, насекомых*) үлгән, үле; **до́хлые му́хи** үле себендәр **2.** *перен., прост.* үтә сибек, ябыҡ, үләкһә; **быть до́хлым** үтә сибек булыу

**ДОХЛЯ́ТИНА** *ж*; *прост.* емтек, үләкһә

**ДО́ХНУТЬ** *несов.* үлеү, зыянлау, ҡырылыу, ҡырғын төшөү (*хайуандарға ҡарата*) ♦ **как му́хи до́хнут** себен кеүек ҡырылалар, тәгәрәшеп ятып үләләр

**ДОХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг.* (*сделать вдох и выдох*) һулау, һулап алыу (ҡуйыу), тын алыу; **дохну́ть све́жим во́здухом** саф һауа һулап алыу **2.** (*подуть*) иҫеү, иҫеп ебәреү; **дохну́л прохла́дный ветеро́к** һалҡынса ел иҫеп ебәрҙе ♦ **дохну́ть не́где (нельзя́)** тын алыр урын юҡ, тын да алып булмай; **дохну́ть не́когда** тын алырға ваҡыт юҡ; **не сметь дохну́ть** тын да алмау (сығармау), шымтайыу, шым-шырыҡ (ҡурҡыу, өндәшмәү)

**ДОХО́Д** *м* килем, төшөм; **годово́й дохо́д** йыллыҡ килем

**ДОХОДИ́ТЬ** *несов. см.* **дойти́** ♦ **ру́ки не дохо́дят** ҡул (теймәү) етмәү (*өлгөрмәү*)

**ДОХО́ДНОСТЬ** *ж* килемлелек, килемле булыу, төшөмлөлөк, төшөмлө булыу; **дохо́дность предприя́тия** предприятиеның килемлелеге

**ДОХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое килемле, төшөмлө, табышлы, файҙалы; **дохо́дное ремесло́** төшөмлө кәсеп

**ДОХО́ДЧИВЫЙ,** -ая, -ое аңлайышлы, ябай; **дохо́дчивый докла́д** аңлайышлы телмәр

**ДОЦЕ́НТ** *м* доцент; **доце́нт ка́федры** кафедра доценты

**ДОЦЕНТУ́РА** *ж* **1.** доцентлыҡ вазифаһы (дәрәжәһе) **2.** *собир.* доценттар

**ДОЦЕ́НТСКИЙ,** -ая, -ое доцент ...ы, доцентлыҡ ...ы; **доце́нтская до́лжность** доцентлыҡ вазифаһы; **доце́нтская ста́вка** доцентлыҡ эш хаҡы

**ДОЧЕРНА́** *нареч.* ҡарайғансы, ҡап-ҡара булғансы; **ба́ня задымлена́ дочерна́** мунса ҡарайғансы төтәтелгән

**ДОЧЕ́РНИЙ,** -яя, -ее *спец.* бүленгән, бүлендек, эйәрсән; **доче́рние предприя́тия** бүлендек предприятиелар ♦ **доче́рние сте́бли** *бот.* бала (йәш) һабаҡтар

**ДО́ЧИСТА** *нареч.* **1.** (*до полной чистоты*) таҙарғансы, тап-таҙа булғансы **2.** *перен., разг.* бер нәмәне лә ҡалдырмай, ҡырып-һепереп, бөтөнләйгә, тотош; **съесть всё до́чиста** бер нәмә лә ҡалдырмай ашап ҡуйыу; **сгоре́ть до́чиста** тотош янып бөтөү, бер нәмә лә ҡалмау

**ДОЧИ́СТИТЬ** *сов. что* таҙартып (әрсеп) бөтөрөү

**ДОЧИТА́ТЬ** *сов. что* уҡып сығыу (бөтөрөү), хәтлем (тиклем) уҡыу; **дочита́ть кни́гу** китапты уҡып сығыу

**ДОЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **дочита́ть**

**ДО́ЧКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **дочь 2.** *разг.* (*обращение*) ҡыҙым ♦ **ма́менькина до́чка** иркә бала (ҡыҙ)

**ДОЧЬ** *ж* ҡыҙ; **моя́ дочь** (минең) ҡыҙым; **еди́нственная дочь** берҙән-бер ҡыҙ(ым)

**ДОШАГА́ТЬ** *сов.* атлап (йәйәүләп) барып (килеп) етеү; **дошага́ть два́дцать киломе́тров** егерме километрҙы атлап (килеп етеү) үтеү

**ДОША́ГИВАТЬ** *несов. см.* **дошага́ть**

**ДОШИВА́ТЬ** *несов. см.* **доши́ть**

**ДОШИ́ТЬ** *сов. что* тегеп бөтөп ҡуйыу, тикле (саҡлы) тегеү

**ДОШКО́ЛЬНИК** *м* и **ДОШКО́ЛЬНИЦА** *ж* **1.** мәктәпкәсә йәштәге бала **2.** *разг.* (*педагог*) мәктәпкәсә йәштәге балалар тәрбиәсеһе

**ДОШКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мәктәпкәсә; **дошко́льный во́зраст** мәктәпкәсә (мәктәпкә тиклемге) йәш; **дошко́льное воспита́ние** мәктәпкәсә тәрбиә

**ДОЩА́НИК** *м* яҫы төплө таҡта кәмә

**ДОЩА́ТЫЙ** и *уст.* **ДОЩАНО́Й,** -ая, -ое таҡта; **доща́тый пол** таҡта иҙән; **доща́тая перегоро́дка** таҡта менән бүленгән

**ДОЩИПА́ТЬ** *сов. что* йолҡоп (семтеп) бөтөү (бөтөрөп ҡуйыу); **дощипа́ть гусе́й** ҡаҙҙарҙы йолҡоп бөтөү

**ДОЩИ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **дощипа́ть**

**ДОЯ́Р** *м* и **ДОЯ́РКА** *ж* һауынсы

**ДРА́ГА** *ж*; *спец.* драга (**1.** *һыу аҫтындағы алтынлы ҡомдо һәм башҡа мәғдәндәрҙе алып йыуыу өсөн яйланмаһы булған ер ҡаҙыу машинаһы* **2.** *һыу төбөнән тереклектәрҙе һәм үҫемлектәрҙе сығара торған прибор*)

**ДРАГОМА́Н** *м* тәржемәсе, тылмас (*Көнсығыш илдәре вәкәләтлегендә эшләүсе Европа дәүләттәре тәржемәсеһе*)

**ДРАГОЦЕ́ННОСТЬ** *ж* **1.** (*ювелирное изделие*) биҙәүес, затлы нәмә (*алтын-көмөштән, аҫыл таштарҙан яһалған*) **2.** *обычно мн.* **драгоце́нности** ҡиммәтле нәмәләр; **семе́йные драгоце́нности** ғаиләнең ҡиммәтле нәмәләре

**ДРАГОЦЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡиммәтле, затлы, аҫыл; **драгоце́нные ка́мни** аҫыл таштар; **драгоце́нные украше́ния** ҡиммәтле биҙәүестәр **2.** *перен.* ҡәҙерле, әһәмиәтле; **теря́ть драгоце́нное вре́мя** ҡәҙерле ваҡытты әрәм итеү (юғалтыу) **3.** (*в обращении*) ҡәҙерле, һөйөклө, ғәзиз; **драгоце́нный ты мой** ҡәҙерлем минең

**ДРАГУ́Н** *м* драгун (*революцияға тиклем Рәсәй армияһында һәм ҡайһы бер сит ил армияларында айырым кавалерия ғәскәре*)

**ДРАГУ́НСКИЙ,** -ая, -ое драгун ...ы; **драгу́нский полк** драгун полкы

**ДРАЖЕ́** *с нескл.* драже, борсаҡ кәнфит; **шокола́дное драже́** шоколадлы борсаҡ кәнфит

**ДРАЗНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* үсекләү, ирештереү, ҡотортоу, үртәү; **дразни́ть соба́ку** этте үсекләү **2.** *что* (*возбуждать*) ҡорсотоу, ҡыҙғытыу; **дразни́ть аппети́т** аппетитты ҡыҙғытыу

**ДРАЗНИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **дразни́ть** 1

**ДРА́ИТЬ** *несов. что*; *разг.*, *мор.* йышыу, йышып таҙартыу, ышҡып таҙартыу (йыуыу); **дра́ить па́лубу песко́м** палубаны ҡом менән ышҡып йыуыу

**ДРА́КА** *ж* **1.** һуғыш, һуғышыу, уҫмаҡ; **лезть в дра́ку** һуғышҡа ҡыҫылыу **2.** һуғыш, алыш, ҡан ҡойош ♦ **по́сле дра́ки кулака́ми не ма́шут** һуғыштан һуң күҫәк күтәрмәйҙәр, туйҙан һуң дөмбөргә

**ДРАКО́Н** *м* **1.** *миф.* аждаһа **2.** *зоол.* аждаһа кеҫәртке (*ҡайһы бер тропик илдәрҙә*)

**ДРАКО́НОВСКИЙ,** -ая, -ое үтә ҡаты, үтә рәхимһеҙ (мәрхәмәтһеҙ); **драко́новские ме́ры** үтә ҡаты саралар

**ДРА́МА** *ж* **1.** *лит.*, *театр.* драма; **написа́ть дра́му** драма яҙыу **2.** *перен.* ҡайғылы кисереш, ауыр ваҡиға (хәл), бәхетһеҙлек; **семе́йная дра́ма** ғаиләләге ауыр хәл

**ДРАМАТИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **драматизи́ровать**

**ДРАМАТИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* **1.** сәхнәләштереү; **драматизи́ровать по́весть** повесты сәхнәләштереү **2.** ваҡиғаны (хәлде) драмалаштырыу, киҫкенләштереү, көсәйтеү

**ДРАМАТИ́ЗМ** *м* **1.** драматизм, көсөргәнешлек (*драмалағы хәрәкәт, хәлгә ҡарата*) **2.** *перен.* көсөргәнешлелек, ауырлыҡ; **драмати́зм положе́ния** хәлдең ауырлығы

**ДРАМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** драма ...ы; **драмати́ческий теа́тр** драма театры; **драмати́ческий актёр** драма актёры **2.** ҡылансыҡ, яһалма; **драмати́ческий жест** яһалма хәрәкәт **3.** ауыр, ҡыйын, көсөргәнешле, драматик; **драмати́ческая развя́зка де́ла** эштең (хәлдең) ауыр сиселеше **4.** *муз.* драматик; **драмати́ческий те́нор** драматик тенор

**ДРАМАТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **драмати́ческий** 2, 3

**ДРАМАТУ́РГ** *м* драматург (*драма әҫәрҙәре яҙыусы*)

**ДРАМАТУРГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое драматургик, драматургия ...ы; **драматурги́ческое мастерство́** драматургик оҫталыҡ

**ДРАМАТУРГИ́Я** *ж* **1.** драматургия (*драма әҫәрҙәре яҙыу теорияһы һәм сәнғәте*) **2.** *собир.*; *лит.* драма әҫәрҙәре, драматик әҫәрҙәр

**ДРАМКРУЖО́К** *м* (*драматический кружок*) драма түңәрәге

**ДРА́НКА** *ж собир.* транса; **покры́ть кры́шу дра́нкой** түбәне транса менән ябыу

**ДРА́НЫЙ,** -ая, -ое *разг.* йыртыҡ, йыртылған, туҙған; **дра́ные брю́ки** йыртыҡ салбар

**ДРАП** *м* драп (*ҡалын йөн туҡыма*)

**ДРАПИРОВА́НИЕ** *с см.* **драпирова́ть**

**ДРАПИРОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** драпировкалау, ҡорма ҡороу, пәрҙә элеү (*тәҙрәгә, ишеккә һ.б.*) **2.** *портн.* (*для скрытия недостатков фигуры*) туҡыманы бөрөп (бөкләп күтәртеп, ҡабартып) һалыу, драпировкалау; **драпирова́ть вы́рез пла́тья обо́рками** күлмәк иҙеүенә, итәк осона балитәктәр һалыу

**ДРАПИРОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *во что*, *чем* ябыныу, бөркәнеү, төрөнөү **2.** *перен.* йәшереү, йөҙлөк кейеү **3.** *страд. от* **драпирова́ть**

**ДРАПИРО́ВКА** *ж см.* **драпирова́ть**, **драпирова́ться**

**ДРАПИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое драпировкалау ...ы, ҡорма-пәрҙәлек, биҙәү, драпировкалауға

китә торған; **драпиро́вочная мастерска́я** драпировкалау оҫтаханаһы; **драпиро́вочный материа́л** драпировкалау, биҙәү өсөн материал

**ДРАПИРО́ВЩИК** *м* и **ДРАПИРО́ВЩИЦА** *ж* драпировкалаусы

**ДРА́ПОВЫЙ,** -ая, -ое драп; **дра́повое пальто́** драп пальто

**ДРА́ТВА** *ж* еп, ишелгән ос, ишелгән, ыҫмалаланған еп (һабаҡ)

**ДРАТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* йыртыу, йыртҡылау, өҙгөләү; **драть бума́гу** ҡағыҙҙы йыртҡылау; **драть о́бувь** аяҡ кейемен йыртыу **2.** *что* һыҙырыу, төшөрөү, һуйыу, тунау, ҡайыҙлау; **драть берёсту** туҙ һыҙырыу; **драть лы́ко** йүкә (ҡурыз) төшөрөү **3.** *кого-что* (*задрать*) ботарлау, талау; **волк дерёт ове́ц** бүре һарыҡты ботарлай **4.** *кого-что*; *разг.* (*бить, хлестать*) ҡайыҙлау, ҡамсылау, сыбыртҡылау, ярыу **5.** *за что*; *разг.* тартыу, һелкеү; **драть за во́лосы** сәстән тартыу **6.** *что* и *без доп.*; *перен.* (*содрать*) талау, тунау; **драть проце́нты** проценттар тунау **7.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*раздражать*) әсеттереү, яндырыу, өтөү; **пе́рец дерёт рот** борос ауыҙҙы яндыра **8.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*царапать*) һыҙырыу, ҡырыу; **бри́тва дерёт щёку** бритва сикәне һыҙыра; **моча́лка си́льно дерёт** йүкә йыуғыс үтә һыҙыра ♦ **драть гло́тку (го́рло)** *прост.* тамаҡ ярыу (йыртыу); **драть зерно́**: 1) ярма һыҙырыу (һурҙырыу); 2) ярма ярҙырыу; **драть шку́ру** тиреһен тунау, терелəй тунау, талау; **моро́з по ко́же (по спине́) дерёт (подира́ет, пробега́ет и т.п.)** *см.* **моро́з**; **чёрт (его́, их, тебя́) дери́** суҡынып кит

**ДРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һуғышыу, яғалашыу, дөмбәҫләшеү **2.** *за что* (*сражаться*) һуғышыу, бәрелешеү, алышыу; **дра́ться за пра́вое де́ло** хаҡлыҡ өсөн һуғышыу **3.** *за что*; *перен.* көрәшеү; **дра́ться за права́ челове́ка** кеше хоҡуҡтары өсөн көрәшеү

**ДРА́ХМА** *ж* драхма (**1.** *Боронғо Грецияла көмөш йәки алтын аҡса*; *хәҙер — Греция аҡса берәмеге* **2.** *метрик системаға индерелгәнгә тиклем ҡулланылған 3,73 грамға тиң аптека үлсәү берәмеге*)

**ДРАЧЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое һуғышҡаҡ, һуғышыусан, һуғыш суҡмары; **драчли́вый ма́льчик** һуғышҡаҡ малай

**ДРАЧУ́Н** *м* и **ДРАЧУ́НЬЯ** *ж*; *разг.* һуғыш суҡмары, һуғышҡаҡ

**ДРЕБЕДЕ́НЬ** *ж*; *разг.* шаҡы-шоҡо, юҡ-бар, ваҡ-төйәк, ыбыр-сыбыр

**ДРЕ́БЕЗГИ: в (ме́лкие) дре́безги (разби́ть, разби́ться)** *разг.* селпәрәмә килтереү (килеү)

**ДРЕБЕЗЖА́НИЕ** *с см.* **дребезжа́ть**

**ДРЕБЕЗЖА́ТЬ** *несов.* зыңғырлау, зыңғырзыңғыр килеү, шалтырау, шалтыр-шолтор килеү; **стёкла дребезжа́т** быялалар зыңғыр-зыңғыр килә

**ДРЕВЕСИ́НА** *ж* **1.** үҙағас; **древеси́на берёзы** ҡайындың үҙағасы **2.** *собир.* ағас, ағас материалдар; **загото́вка древеси́ны** ағас әҙерләү

**ДРЕВЕ́СНИЦА** *ж* **1.** (*гусеница*) ағас күбәләгенең ҡарышлауығы, ағас ҡарышлауығы **2.** ағас тәлмәрйене

**ДРЕВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое ағас ...ы; **древе́сные поро́ды** ағас тоҡомдары; **древе́сная смола́** ағас ыҫмалаһы (сайыры); **древе́сный уж** ағас туҙбаш йыланы

**ДРЕ́ВКО** *с* һап; **дре́вко зна́мени** байраҡ һабы; **дре́вко копья́** һөңгө һабы

**ДРЕВНЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "боронғо", "элекке" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **древнеру́сский** боронғо урыҫ; **древнетю́ркский** боронғо төрки

**ДРЕ́ВНИЙ,** -яя, -ее **1.** боронғо, элекке; **дре́вние па́мятники** боронғо ҡомартҡылар; **дре́вние языки́** боронғо телдәр; **дре́вний обы́чай** боронғо йола **2.** (*дряхлый*) бик ҡарт, йәшәгән, ныҡ ҡартайған; **дре́вний стари́к** йәшәгән ҡарт **3.** *в знач. сущ.* **дре́вние** *мн.* боронғолар

**ДРЕ́ВНОСТЬ** *ж* **1.** боронғо, боронғо заман; **в глубо́кой дре́вности** бик боронғо заманда, борон-борон заманда **2.** *обычно мн.* **дре́вности** элекке (боронғо) ҡомартҡылар; **музе́й дре́вностей** боронғо ҡомартҡылар музейы

**ДРЕ́ВО** *с*; *уст.*, *трад.-поэт. см.* **де́рево** ♦ **дре́во позна́ния** белем шишмәһе; **родосло́вное дре́во** шәжәрә, тайра

**ДРЕВОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ағас һымаҡ (кеүек); **древови́дный па́поротник** ағас кеүек абаға

**ДРЕВОНАСАЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** ағас ултыртыу **2.** *обычно мн.* **древонасажде́ния** ултыртылған ағастар

**ДРЕВОСТО́Й** *м собир.*; *лес.* ағаслыҡ; **одновозрастно́й древосто́й** тиң йәштәге ағаслыҡ; **сме́шанный древосто́й** ҡатнаш ағаслыҡ

**ДРЕВОТО́ЧЕЦ** *м* ағас ҡорто, ағас ҡуңыҙы

**ДРЕДНО́УТ** *м*; *мор.* дредноут (*ныҡ ҡоралланған тиҙ йөрөшлө ҙур броненосец*)

**ДРЕЗИ́НА** *ж*; *ж.-д.* дрезина (*рельстар буйлап үҙ алдына йөрөтөлә торған тимер юл арбаһы*)

**ДРЕЙФ** *м*; *мор.* дрейф (*ел йәки һыу ағымы арҡаһында караптың йүнәлеше үҙгәреүе, курстан тайпылыуы*; *шулай уҡ боҙҙарҙың да һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөүе*) ♦ **лечь в дрейф** дрейфҡа ятыу (*карапты бер урында хәрәкәтһеҙ тоторлоҡ итеп елкәндәрҙе ҡороу*)

**ДРЕ́ЙФИТЬ** *несов.*; *прост.* ҡурҡыу, ҡурҡыуға ҡалыу

**ДРЕЙФОВА́ТЬ** *несов.*; *мор.* **1.** курстан тайпылыу, йүнәлеш үҙгәреү **2.** *что безл.* (*сносить с места ветром или течением стоящее на якоре судно*) ағыҙып алып китеү

**ДРЕЛЬ** *ж*; *тех.* дрель (*быраулы электр тоғы йәки механик рәүештә әйләндерә торған ҡулайлама*)

**ДРЁМА** *ж*; *разг. см.* **дремо́та**

**ДРЕМА́ТЬ** *несов.* **1.** йоҡомһорау, ҡалғыу, ойоу, серем итеү; (*о животных*) юшау **2.** *перен.* һелкенмәү, ойоу, тып-тын тороу ♦ **не дрема́ть** уяу (һаҡ, һиҙгер) булыу (тороу)

**ДРЕМА́ТЬСЯ** *несов. безл.* йоҡомһоратыу, йоҡо баҫыу (килеү); **к ве́черу дре́млется** кискә табан йоҡомһората, йоҡо баҫа

**ДРЕМО́ТА** *ж* йоҡомһорау, йоҡо баҫыу, серем итеү; **дремо́та одолева́ет** йоҡо баҫа

**ДРЕМО́ТНЫЙ,** -ая, -ое йоҡо килтергес (килтерә торған), йоҡо килтерерлек; **дремо́тное состоя́ние** йоҡо килтергес хәл; **дремо́тная тишина́** йоҡо килтергес тынлыҡ

**ДРЕМУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*о лесе*) ҡара, ҡуйы, ҡалын; **дрему́чий лес** ҡалын ҡара урман **2.** *перен.* ҡара, тома, шыр; **дрему́чий неве́жда** шыр наҙан

**ДРЕНА́Ж** *м* дренаж (**1.** *тех. канауҙар, торбалар ярҙамында һаҙлыҡ киптерең системаһы һәм ысулы* **2.** *мед. эренле яранан көпшә ярҙамында эрен, һыл ағыҙыу*)

**ДРЕНАЖИ́РОВАТЬ** *несов. что*; *тех.*, *мед.* дренаж яһау (үткәреү), дренажлау

**ДРЕНА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *тех.*, *мед.* дренаж ...ы; **дрена́жные тру́бы** дренаж торбалары; **дрена́жные тру́бки** дренаж көпшәләре

**ДРЕСВА́** *ж* эре ҡом, ваҡ таш

**ДРЕССИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **дрессирова́ть** **2.** *прил.* өйрәтелгән, күнектерелгән; **дрессиро́ванные зве́ри** өйрәтелгән хайуандар

**ДРЕССИРОВА́ТЬ** *несов. кого-что* өйрәтеү, күнектереү; **дрессирова́ть соба́к** эттәрҙе өйрәтеү

**ДРЕССИРО́ВКА** *ж см.* **дрессирова́ть**

**ДРЕССИРО́ВЩИК** *м* и **ДРЕССИРО́ВЩИЦА** *ж* хайуандарҙы өйрәтеүсе, күнектереүсе

**ДРОБИ́ЛКА** *ж*; *разг.* дробилка, ваҡлағыс, онтағыс (*машина*)

**ДРОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ваҡлағыс, онтағыс, ваҡлау ...ы, онтау ...ы; **дроби́льная маши́на** ваҡлағыс машина

**ДРОБИ́НА** *ж* йәҙрә бөртөгө, бер бөртөк йәҙрә

**ДРОБИ́НКА** *ж*; *уменьш. от* **дроби́на**

**ДРОБИ́ТЬ** *несов. что* **1.** ваҡлау, онтау, ярыу; **дроби́ть ка́мни** таш ватыу, ваҡлау; **дроби́ть ко́сти** һөйәк онтау, ваҡлау **2.** (*делить, расчленять*) ваҡлау, бүлеү, бүлгеләү; **дроби́ть це́лое число́** бөтөн һанды бүлеү **3.** *по чему*; *разг.* (*часто стучать*) тыпырлау, тупырлатыу, тыпырлатыу; **град дроби́т по кры́ше** ҡыйыҡты боҙ тупырлата

**ДРОБИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*разбиваться*) ваҡланыу, онталыу, ярылыу **2.** (*расчленяться*) таралыу, бүленеү, тарҡалыу; **отря́д бы́стро дроби́лся на гру́ппы** отряд тиҙ генә төркөмдәргә тарҡалды **3.** *страд. от* **дроби́ть** 1, 2

**ДРОБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **дроби́ть** 1, 2 и **дроби́ться** 1, 2; **дробле́ние зерна́** игенде ярмаға ярыу; **дробле́ние ще́бня** ваҡ ташты онтау **2.** *биол.* бүленеү; **дробле́ние кле́ток** күҙәнәктәр бүленеүе

**ДРОБНИ́ЦА** *ж*; *охот.* йәҙрә янсығы (тоҡсайы)

**ДРО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*разделённый, расчленённый*) бүленгән, бүлгеләнгән, ваҡланған **2.** (*частый — о звуках, шагах и т.п.*) туп-туп, тупыр-тупыр иткән, тупырлаған, тупыр иткән (*тауыш*), тып-тып-тып, тыптыр-тыптыр; **дро́бный то́пот коне́й** аттарҙың тупыр-тупыр тояҡ тауышы; **дро́бный стук дождя́** тыптырлап яуған ямғыр тауышы **3.** *мат.* кәсер, кәсерле; **дро́бные чи́сла** кәсер һандар ♦ **дро́бные числи́тельные** *грам.* кәсерле һандар

**ДРОБОВИ́К** *м* йәҙрә мылтығы

**ДРОБЬ** *ж* **1.** йәҙрә, дробь **2.** *мат.* кәсер; **десяти́чная дробь** унарлы кәсер; **просты́е дро́би** ябай кәсерҙәр

**ДРОВА́** *только мн.* утын; **берёзовые дрова́** ҡайын утын; **сыры́е дрова́** сей утын ♦ **кто в лес, кто по дрова́** төрлөһө-төрлөсә, төрлөһө — төрлө яҡҡа, тырым-тырағай

**ДРО́ВНИ** *только мн.* утын санаһы

**ДРОВОЗАГОТО́ВКИ** *мн.* (*ед.* **дровозаготóвка** *ж*) утын әҙерләү

**ДРОВОКО́Л** *м* утын ярыусы (*кеше*)

**ДРОВОСЕ́К** *м* **1.** утын ҡырҡыусы **2.** *зоол.* мыйыҡлы ҡуңыҙ

**ДРОВЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** утын ...ы; **дровяно́й сара́й** утын һарайы **2.** утын яғып йылытылған; **дровяно́е отопле́ние** утын яғып йылытыу

**ДРО́ГИ** *только мн.* оҙон арба

**ДРО́ГНУТЬ** *сов.* **1.** терт итеү, тертелдәү, тертләү, тетрәү, тартылыу (тартыу), һелкенеү; **те́ло его́ дро́гнуло** тәне тертләп ҡуйҙы; **земля́ дро́гнула от взры́ва** шартлауҙан ер һелкенде; **се́рдце его́ дро́гнуло** уның йөрәге тертләне **2.** ҡалтырау, ҡалтыранып ҡуйыу (китеү); **рука́ его́ не дро́гнула** уның ҡулы ҡалтыраманы; **го́лос мой дро́гнул** минең тауышым ҡалтырап китте **3.** ҡаушау, ҡуҙғалыу, ҡуҙғалып ҡуйыу (китеү); **толпа́ дро́гнула** халыҡ төркөмө ҡуҙғалып ҡуйҙы; **враг дро́гнул** дошман ҡаушаны ♦ **рука́ не дро́гнет** ҡулы ҡалтырамаҫ

**ДРОЖА́НИЕ** *с см.* **дрожа́ть**

**ДРОЖА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡалтырау, ҡалтыраныу, дерелдәү, дер-дер килеү; **дрожа́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан ҡалтыраныу; **стёкла о́кон дрожа́ли** тәҙрә быялалары дерелдәп торҙо **2.** (*мерцать*) емелдәү, ем-ем итеү; **в не́бе дрожа́ли звёзды** күктә йондоҙҙар емелдәне **3.** *перен.* ҡалтырау, йөрәк сығыу, хафаланыу, борсолоу; **се́рдце дрожи́т** йөрәк ҡалтырай; **мать дрожи́т за своего́ ребёнка** әсә балаһы өсөн хафаланып тора **4.** *над чем* (*скупо расходовать*) ҡалтырап тороу; **дрожа́ть над ка́ждой копе́йкой** һәр бер тин өсөн ҡалтырап тороу

**ДРОЖЖЕВО́Й,** -ая, -ое әсетке ...ы; **дрожжево́е те́сто** әсе ҡамыр; **дрожжевы́е грибки́** әсетке бәшмәктәре

**ДРО́ЖЖИ** *только мн.* әсетке, сүпрә, ҡур ♦ **как на дрожжа́х (расти́, поднима́ться)** бик тиҙ үҫеү, күпләп үҫеү

**ДРО́ЖКИ** *только мн.* еңел арба, ҡуян арба

**ДРОЖЬ** *ж* ҡалтырау, дерелдәү; **броса́ет в дрожь** *безл.* ҡалтырата башлай; **говори́ть с дро́жью в го́лосе** ҡалтыранған тауыш менән һөйләү

**ДРОЗД** *м* барҡылдаҡ; **дрозд-белобро́вик** аҡ ҡаш барҡылдаҡ; **дрозд пе́вчий** йырсы барҡылдаҡ; **дрозд-ряби́нник** мышар барҡылдағы; **дрозд си́ний** күк барҡылдаҡ

**ДРО́ТИК** *м* дротик, ҡыҫҡа һаплы һөңгө (*боронғо һуғыш ҡоралы*)

**ДРОФА́** *ж* туғаҙаҡ

**ДРУГ I** *м* **1.** дуҫ, әшнә; **ста́рый друг лу́чше но́вых двух** иҫке дуҫ яңы ике дуҫҡа биргеһеҙ **2.** (*при обращении*) дуҫым, дуҫҡай ♦ **будь дру́гом** зинһар, зинһар өсөн (*үтенес менән мөрәжәғәт иткәндә*)

**ДРУГ II: друг дру́га** бер-береһен; **друг дру́гу** бер-береһенә; **друг за дру́гом** бер-бер артлы; **друг за дру́га** бер-береһе өсөн; **друг про́тив дру́га** бер-береһенә ҡаршы; **друг о дру́ге** бер-береһе тураһында; **друг с дру́гом** бер-береһе менән

**ДРУГО́Й,** -ая, -ое **1.** башҡа, бүтән; **в друго́й раз** бүтән ваҡытта **2.** икенсе, иртәгәһен; **на друго́й день** икенсе көндө, иртәгәһенә **3.** *в знач. сущ.* **друго́й** *м*, **друга́я** *ж*, **друго́е** *с* башҡа, бүтән, икенсе, башҡа берәү; **забо́титься о други́х** бүтәндәр тураһында ҡайғыртыу; **ему́ говори́шь одно́, он де́лает друго́е** уға бер нәмә әйтәһең, ул икенсене эшләй ♦ **э́то друго́е де́ло** уныһы башҡа эш; улай булһа, эш башҡа; **други́ми слова́ми** икенсе төрлө әйткәндә, икенсе һүҙ менән әйткәндә; **одна́ нога́ здесь, (а) друга́я там** бер аяғың бында, икенсеһе — тегендә

**ДРУ́ЖБА** *ж* дуҫлыҡ; **води́ть дру́жбу** *с кем-л.* дуҫлашыу, дуҫ булыу; **дру́жба наро́дов** халыҡтар дуҫлығы ♦ **не в слу́жбу, а в дру́жбу** дуҫлыҡ хөрмәтенә

**ДРУЖЕЛЮ́БИЕ** *с* дуҫлыҡ мөнәсәбәте (тойғоһо, хисе), күңел ятыу; **показа́ть дружелю́бие** дуҫлыҡ мөнәсәбәте күрһәтеү

**ДРУЖЕЛЮ́БНЫЙ,** -ая, -ое дуҫтарса (яҡын), күңелсәк; **дружелю́бный взгляд** дуҫтарса яҡын ҡараш; **дружелю́бное отноше́ние** дуҫтарса яҡын мөнәсәбәт

**ДРУ́ЖЕСКИЙ,** -ая, -ое дуҫлыҡ ...ы, дуҫтарса, ысын күңелдән; **дру́жеский приве́т** дуҫлыҡ сәләме, дуҫтарса сәләм; **дру́жеское уча́стие** дуҫтарса ҡатнашлыҡ ♦ **быть на дру́жеской ноге́** *с кем* әшнә булыу, әшнәлек мөнәсәбәтендә булыу

**ДРУ́ЖЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое дуҫлыҡ ...ы, дуҫлыҡ мөнәсәбәтендәге; **дру́жественные свя́зи** дуҫлыҡ бәйләнештәре; **дру́жественные стра́ны** дуҫлыҡ мөнәсәбәтендәге илдәр

**ДРУЖИ́НА** *ж* дружина (**1.** *элекке Рәсәйҙә һәм боронғо Көнбайыш илдәрҙә кенәздәр ҡарамағындағы ҡораллы ғәскәр* **2.** *берәй маҡсат менән ойошторолған хәрби төркөм, ополчение йәки ирекле йәмғәт ойошмаһы*); **наро́дная дружи́на** халыҡ дружинаһы

**ДРУЖИ́ННИК** *м* и **ДРУЖИ́ННИЦА** *ж* дружинасы, дружина ағзаһы

**ДРУЖИ́ТЬ** *несов. с кем* и *без доп.* дуҫлашыу, дуҫ булыу; **дружи́ть с одноклáссниками** синыфташтар менән дуҫлашыу

**ДРУЖИ́ЩЕ** *м*; *разг.* дуҫҡай

**ДРУ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дуҫ, татыу; **дру́жная семья́** татыу ғаилә; **дру́жный коллекти́в** татыу коллектив; **быть дру́жными** дуҫ булыу **2.** дәррәү, берҙәм, әүҙем, бер юлы, бер ваҡытта; **дру́жная весна́** дәррәү (килгән) яҙ; **дру́жная рабо́та** берҙәм эш

**ДРУЖО́К** *м*; *ласк.* дуҫҡай, әшнә, ҡушаға

**ДРЫ́ГАТЬ** *несов. чем*; *разг.* тыпырсыныу, тибенеү; **дры́гать нога́ми** аяҡ менән тыпырсыныу

**ДРЫ́ГНУТЬ** *сов. чем*; *разг.* тыпырсынып ҡуйыу, тибеп ебәреү

**ДРЯ́БЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** һулыған, сырышҡан; **дря́блое лицо́** сырышҡан бит **2.** *перен.* ебегән, ебек, йомшаҡ **3.** *перен.* ҡаҡшаған, туҙған, бәлтерәгән

**ДРЯ́БНУТЬ** *несов.*; *разг.* һулыу, бәлтерәү, сырышыу

**ДРЯ́ЗГИ** *мн.*; *разг.* юҡ-бар һүҙ, әрләш, талаш, ыҙғыш; **дома́шние дря́зги** өйҙәге ыҙғыш

**ДРЯННО́Й,** -ая, -ое *разг.* алама, насар, йүнһеҙ, әшәке, хөрт; **дрянно́й челове́к** алама кеше

**ДРЯНЬ** *ж*; *разг.* **1.** *собир.* алама, алам-һалам, иҫке-моҫҡо, ҡый-ғыпыр **2.** *в знач. сказ.* хөрт, бик насар; **де́ло дрянь** эш хөрт; **пого́да дрянь** көн бик насар

**ДРЯХЛЕ́ТЬ** *сов.* ныҡ ҡартайыу, бәлтерәү, бәҫтән (ҡарыуҙан) тайыу

**ДРЯ́ХЛОСТЬ** *ж* ныҡ ҡартайғанлыҡ, бәлтерәгәнлек, бәҫтән (ҡарыуҙан) тайыу

**ДРЯ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ныҡ ҡартайған, бәлтерәгән, бәҫтән (ҡарыуҙан) тайған, бәҫһеҙ, ҡарыуһыҙ **2.** *перен.*, *разг.* (*старый — о предметах*) туҙған, иҫкергән, эштән сыҡҡан, алама

**ДУАЛИ́ЗМ** *м*; *филос.* дуализм (*донъяның нигеҙендә ике үҙ аллы, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы, бер-береһе менән көрәш алып барыусы ике башланғыс — материя һәм рух ятыуын раҫлаған идеалистик тәғлимәт*)

**ДУАЛИ́СТ** *м* дуалист (*дуализм тәғлимәтен яҡлаусы*)

**ДУАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое дуалистик, дуализм ...ы; **дуалисти́ческая филосо́фия** дуалистик фәлсәфә

**ДУБ** *м* имән; **высо́кий дуб** бейек имән

**ДУБА́СИТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** дөмбәçләү; **дуба́сить друг дру́га** бер-береһен дөмбәçләү **2.** *по чему*, *во что* даһырлатыу, дөбөрләтеү; **дуба́сить в дверь** ишек дөбөрләтеү

**ДУБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дуплау …ы; **дуби́льный заво́д** дуплау заводы

**ДУБИ́ЛЬНЯ** *ж* дуплау бинаһы, тире иләү урыны

**ДУБИ́ЛЬЩИК** *м* дуплаусы, тире иләүсе

**ДУБИ́НА** *ж* **1.** күçәк, суҡмар **2.** *бран.*, *прост.* (*о человеке*) күҙле бүкән, бағана, аңра

**ДУБИ́НКА** *ж*; *уменьш. от* **дуби́на** 1

**ДУБИ́НУШКА** *ж*; *трад.-поэт.*, *уменьш.-ласк. от* **дуби́на**

**ДУБИ́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* буяу, буяҡтыс матдә, дуплау матдәһе; **органи́ческие дуби́тели** органик буяҡтыс матдәләр

**ДУБИ́ТЬ** *несов. что* (тире) дуплау, иләү

**ДУБИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **дуби́ть**

**ДУБЛЕ́НИЕ** *с* дуплау, тире эшкәртеү; **дубле́ние ко́жи** тире дуплау

**ДУБЛЁНКА** *ж* дупланған тун

**ДУБЛЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дупланған; **дублёная овчи́на** дупланған һарыҡ тиреһе **2.** *перен.*, *разг.* (*огрубелый*) тутлаған, ҡояшҡа янған; **дублёное лицо́** ҡояшҡа янған йөҙ

**ДУБЛЁР** *м* дублёр; **арти́ст-дублёр** дублёр артист; **дублёр космона́вта** космонавт дублёры

**ДУБЛЕ́Т** *м* дублет (**1.** *бер иш ике нәмәнең һыңары* **2.** *һунар. мылтыҡтың ике көбәгенең дә бер юлы атыуы*)

**ДУБЛИКА́Т** *м* дубликат (*документтың төп нөсхә менән бер үк хоҡуҡта булған күсермәһе*)

**ДУБЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **дубли́ровать**

**ДУБЛИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* **1.** ҡабатлау, бер иш (үк) эште эшләү; **дубли́ровать рабо́ту друго́го предприя́тия** икенсе предприятие менән бер үк эште эшләү, икенсе предприятиеның эшен ҡабатлау, кадрҙы ҡабатлау **2.** *театр.* алмаштырыу, алмашлап уйнау; **дубли́ровать исполни́теля гла́вной ро́ли** төп ролде ике (өс) артист алмашлап уйнау **3.** *кино.* дубляж яһау (тәржемә итеү), икенсе телгә күсереү

**ДУБЛИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **дубли́ровать**

**ДУБЛЬ** *м*; *кино.* дубль, ҡабатлау (*фильмда бер кадрҙы бер нисә мәртәбә төшөрөү*)

**ДУБЛЯ́Ж** *м*; *кино.* дубляж (*кинофильмды икенсе телгә күсереү*)

**ДУБНЯ́К** *м* имәнлек, имән урманы, туйралыҡ; **молодо́й дубня́к** ваҡ туйралыҡ

**ДУБОВИ́К** *м* имән бәшмәге

**ДУБО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** имән …ы; **дубо́вый лес** имән урманы **2.** имән, имәндән эшләнгән (яһалған); **дубо́вый стол** имән өçтәл **3.** *перен.*, *разг.* (*жёсткий*, *грубый*) ҡаты, тупаç, имән кеүек; **дубо́вые я́блоки** ҡаты алма

**ДУБРА́ВА** *ж* имәнлек, туйралыҡ

**ДУГА́** *ж* **1.** (*часть упряжи*) дуға; **гнуть дугу́** дуға бөгөү **2.** (*часть окружности*, *круга*) дуға, кәкерсәк ♦ **бровь дуго́й** дуғаланып торған ҡыйғас ҡаш; **электри́ческая дуга́** *физ.* электр дуғаһы; **гнуть в дугу́** кешене теләгәнсә йөрөтә алыу, үҙ ихтыярыңа буйһондороу

**ДУГООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое дуға кеүек (һымаҡ), дуғаланып торған; **дугообра́зный мост** дуғаланып торған күпер

**ДУДЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* һыбыҙғы уйнау (һыҙғыртыу) ♦ **дуде́ть в одну́ дуду́**: 1) бер теләктә (маҡсатта) эш итеү; 2) бер нәмәне туҡыу (тылҡыу)

**ДУ́ДКА** *ж* һыбыҙғы; **бо́цманская ду́дка** боцман һыбыҙғыһы ♦ **пляса́ть под ду́дку** *чью* кеше йырын йырлау, ҡурайына бейеү

**ДУ́ДКИ** *межд.*; *прост.* (*выражает отрицание*, *несогласие*, *отказ*) эләкмәй торһон, тәтемәй торһон, шулай булмағайы

**ДУ́ЖКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **дуга́** 1; **2.** тотҡа; **ведёрная ду́жка** биҙрә тотҡаһы **3.** *анат.* (*грудная кость у птиц*) йәтәс, сәтәш

**ДУ́ЛО** *с* көбәк, көбәк ауыҙы (тишеге); **ду́ло ружья́** мылтыҡ көбәге; **наце́лить ду́ло** көбәкте төҙәү

**ДУ́МА** *ж* **1.** уй, уйланыу; **ду́мы о ро́дине** ватан тураһында уйланыу; **погрузи́ться в ду́му** уйға батыу **2.** дума; **Боя́рская ду́ма** Баярҙар думаһы; **Госуда́рственная ду́ма** Дәүләт думаһы **3.** дума (*украин халыҡ ҡобайырының бер төрө*)

**ДУ́МАТЬ** *несов. о ком-чём*, *над чем* и *без доп.* **1.** уйлау, баш ватыу; **ду́мать над реше́нием пробле́мы** мәсьәләне хәл итеү тураһында уйлау **2.** *с неопр.* (*намереваться*) уйлау, иçәпләү, иçәп тотоу; **ду́маем заверши́ть рабо́ту сего́дня** эште бөгөн бөтөрөргә уйлайбыҙ ♦ **ду́мать ду́му** уйланыу, уйға сумыу; **и ду́мать забы́ть** *о ком-чём* бөтөнләй онотоу, иçкә лә төшмәү, иçтән сығыу; **и ду́мать не́чего** уйлап тораһы ла юҡ, уйларға ла түгел; **мно́го ду́мать о себе́** үҙен әллә кемгә һанау, үҙен юғары ҡуйыу; **недо́лго ду́мая** оҙаҡ уйлап тормаçтан, күп уйламайынса; **я ду́маю!** һис шикһеҙ!, әлбиттә шулай!

**ДУ́МАТЬСЯ** *несов. безл.* уйлау, уйға килеү; **мне ду́мается** минең уйымса (уйлауымса); **вы́шло не так, как ду́малось** уйлағанса килеп сыҡманы

**ДУМБЫРА́** *ж*; *обл. см.* **до́мбра**

**ДУ́МКА** *ж* (*подушечка*) күпсек, ҡолаҡ мендәре

**ДУНОВЕ́НИЕ** *с* иçеү; **дунове́ние ве́тра** ел иçеүе

**ДУ́НУТЬ** *сов. см.* **дуть** 1

**ДУ́ПЕЛЬ** *м* зырҡыуыт (*кош*); **ду́пель го́рный** тау зырҡыуыты; **ду́пель лесно́й** урман зырҡыуыты

**ДУПЛЕ́Т** *м* дуплет (*бильярд уйынында — бер шар менән икенсе шарҙы бортҡа ҡаҡсыта һуғып, лузаға төшөрөү*)

**ДУПЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое эсе ҡыуыш, ҡыуышлы; **дупли́стое де́рево** эсе ҡыуыш ағас

**ДУПЛО́** *с* **1.** (*в дереве*) ағас ҡыуышы **2.** (*в зубе*) теш соҡоро (тишеге)

**ДУ́РА** *ж см.* **дура́к**

**ДУРА́К** *м*; *разг.* алйот, иҫәр, иҫәүән ♦ **валя́ть дурака́** *прост.*: 1) (*бездельничать*) эшһеҙ (тик) йөрөү, ваҡытты бушҡа үткәреү; 2) (*дурачиться*) алйотланыу, иҫәрләнеү, аҡылһыҙланыу; **дура́к дурако́м** шыр тиле, алйоттоң-алйото, иҫәрҙең-иҫәре, төптө аҡылһыҙ; **дурака́м зако́н не пи́сан** алйотҡа (иҫәргә) закон юҡ, аҡылһыҙға аҡыл кәрәкмәй; **нашёл дурака́** аҡылың алтау икән, тапҡан иҫәрҙе; **не дура́к** үҙ аҡылы үҙенә етә, алйот (иҫәр) түгел; **оста́вить в дурака́х**: 1) *карт.* дурак ҡалдырыу, отоу; 2) *кого* алдау, ултыртыу, отоу, һемәйтеү

**ДУРАЛЕ́Й** *м*; *разг. см.* **дура́к**

**ДУРА́НДА** *ж см.* **жмых**

**ДУРА́ЦКИЙ,** -ая, -ое *разг.* алйоттар ...ы, иҫәрҙәр ...ы, мәғәнәһеҙ, насар, алама; **дура́цкие привы́чки** алама ғәҙәттәр; **дура́цкий разгово́р** мәғәнәһеҙ һөйләшеү

**ДУРА́ЧЕСТВО** *с*; *разг.* алйотлоҡ, иҫәрлек, ауһарлыҡ, былағайлыҡ

**ДУРАЧИ́НА** *м*; *прост.*, *бран. см.* **дура́к**

**ДУРА́ЧИТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* алдау, һемәйтеү, башты әйләндереү, бутау

**ДУРА́ЧИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* алйотланыу, былағайланыу, иҫәрләнеү, йүләрләнеү

**ДУРАЧО́К** *м*; *разг.*, *уменьш.-ласк. от* **дура́к**

**ДУРА́ШЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*глуповатый*) алйотораҡ, иҫәрерәк, аҡылға бер төрлөрәк **2.** (*несерьёзный*, *озорной*) шаян, мәрәкәсел, былағай; **дура́шливые вы́ходки** былағай ҡыланыштар

**ДУ́РЕНЬ** *м*; *прост. см.* **дура́к**

**ДУРЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*глупеть*) алйотланыу, иҫәрләнеү **2.** ҡаңғырыу, баш ҡатыу (әйләнеү), иҫереү; **дуре́ть от уга́ра** еҫкә иҫереү; **дуре́ть от ка́чки** сайҡалыуҙан баш әйләнеү

**ДУРИ́ТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* **1.** (*сумасбродничать*) алйотланыу, былағайланыу, дыуамалланыу **2.** (*упрямиться*) ҡылыҡһыҙланыу, сығынсылау, сығынлау; **ло́шадь дури́т** ат сығынсылай ♦ **дури́ть го́лову** *кому* баш әйләндереү

**ДУРМА́Н** *м* **1.** *бот.* ҡаразирә **2.** иҫерткес, баш ҡаңғыртҡыс (әйләндергес) **3.** *перен.* аңды томалағыс, ағыу

**ДУРМА́НИТЬ** *несов. кого-что*; *прям.*, *перен.* томалау, иҫертеү, ағыулау; **дурма́нить го́лову** аңды томалау

**ДУРМА́НИТЬСЯ** *несов. страд. от* **дурма́нить**

**ДУРМА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прил. от* **дурма́н** 1; **дурма́нный ко́рень** ҡаразирә тамыры **2.** *разг.* иҫерткес; **дурма́нная сонли́вость** иҫерткес йоҡо

**ДУРНЕ́ТЬ** *несов.* йәмһеҙләнеү, (йөҙө, һыны) боҙолоу

**ДУ́РНО 1.** *нареч.* йәмһеҙ, насар, алама, яман; **ду́рно вести́ себя́** үҙеңде йәмһеҙ тотоу **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* насар, ҡыйын; **ему́ ду́рно** ул үҙен насар һиҙә (тоя), уға ҡыйын

**ДУРНО́Й,** -ая, -ое **1.** йәмһеҙ, алама, боҙоҡ, әшәке, яман; **дурна́я пого́да** алама көн; **дурно́й за́пах** яман еҫ; **дурно́й челове́к** әшәке кеше **2.** *обычно кратк. ф.* (*некрасивый*) йәмһеҙ, килбәтһеҙ, һынһыҙ, ямаҡ ♦ **дурна́я сла́ва** ямамнат; **дурно́й глаз** яман күҙ

**ДУРНОТА́** *ж* үҙен насар һиҙеү, баш әйләнеү, күңел болғаныу; **почу́вствовать дурноту́** үҙен насар һиҙеү

**ДУРНУ́ШКА** *ж*; *разг.* йәмһеҙ, һөйкөмһөҙ (*катын-кыҙға карата*)

**ДУ́РОСТЬ** *ж*; *разг.* алйотлоҡ, иҫәрлек, аҡылһыҙлыҡ; **сде́лать по ду́рости** *что-л.* иҫәрлектән ниҙер ҡылыу, эш боҙоу

**ДУРШЛА́Г** *м* тишекле сүмес, үтәләк

**ДУРЬ** *ж*; *разг.* алйотлоҡ, йүләрлек, дыуамаллыҡ ♦ **вы́бить дурь из головы́** *прост.*; **вы́бить дурь** *прост.* аҡылға ултыртыу (өйрәтеү); **вы́бросить (вы́кинуть) дурь из головы́** *прост.* аҡылға ултырыу, аҡылланыу

**ДУСТ** *м*; *хим.* дуст (*ағыулы онтаҡ*)

**ДУ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** эсе ҡыуыш, ҡыуыш эсле, ҡыуыш итеп яһалған; **ду́тые ши́ны** эсе ҡыуыш шиналар **2.** *перен.* ҡабартылған, арттырылған, ялған; **ду́тые ци́фры** ҡабартылған (арттырып бирелгән) һандар

**ДУТЬ** *несов.* **1.** өрөү, иҫеү; **ве́тер ду́ет** ел иҫә; **здесь ду́ет** *безл.* бында ел өрә; **дуть на горя́чий чай** эҫе сәйгә өрөү **2.** *что*; *тех.* өрҙөрөп эшләү, яһау; **дуть стекля́нные буты́лки** быяла шешәләрҙе өрҙөрөп эшләү ♦ **дуть гу́бы (гу́бки)** ирен турһайтыу, үпкәләү; **и в ус не дуть** иҫе лә китмәү, уйында ла булмау; **куда́ (отку́да) ве́тер ду́ет** *см.* **ве́тер**

**ДУТЬЁ** *с*; *тех.* **1.** өрҙөрөү, өрҙөрөп эшләү; **горя́чее дутьё** эҫе (һауа) өрҙөрөү **2.** өрҙөргөс (*кулайлама*); **до́менная печь с дутьём** өрҙөргөслө домна мейесе

**ДУ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *на кого-что* и *без доп.*; *разг.* үпкәләү, турһайыу, ауыҙ турһайтыу; **ду́ться друг на дру́га** бер-береһенә турһайыу **2.** *во что*; *прост.* мауығыу, бирелеп (мауығып) уйнау, һуғыу (*кәрт*, *шашка һ.б.*); **дуться в ша́шки** шашкала мауығып уйнау; **ду́ться в ка́рты** кәрт һуғыу

**ДУХ** *м* **1.** аң, аҡыл, рух; **в здоро́вом те́ле здоро́вый дух** сәләмәт тәндә сәләмәт рух **2.** (*моральное состояние*, *самочувствие*) дарман, рух, күңел, рухи көс; **подня́ть дух** рух күтәреү; **упа́док ду́ха** рух төшөнкөлөгө; **набра́ться ду́ху** дарман (көс) алып, тәүәккәлләнеп; **собра́ться с ду́хом** дарман (көс) туплау **3.** *миф.*, *рел.* рух, әруах, зат, йән; **до́брый дух** изге рух; **злой дух** уҫал рух (зат) **4.** *разг.* (*дыхание*) тын, һулыш;

**дух захва́тывает** тын туҡталыу, тын ҡыҫыу; **дух замира́ет** тын туҡтала, тын бөтә; **затаи́ть дух** тын да алмай тороу, һағайыу; **перевести́ дух** иркенләп тын алып ебәреү **5.** *прост.* (*запах*) еҫ, аңҡыш; **лесно́й дух** урман еҫе; **грибно́й дух** бәшмәк еҫе **6.** *в знач. нареч.* **ду́хом**; *прост.* (*очень быстро*) һә тигәнсе, бик тиҙ, күҙ асып йомғансы; (*без остановки, сразу*) бер юлы, туҡтамай; **вы́пить одни́м ду́хом** бер юлы, тын да алмай эсеп ебәреү ♦ **быть не в ду́хе** кәйеф булмау, күңелһеҙ булыу; **во весь дух**; **что есть ду́ху (бежа́ть, мча́ться)** йән-фарман (сабыу); **дух вон** *у кого*; *прост.* йән биреү, үлеү; **ду́ху не хвата́ет** йөрәк етмәй, тәүәккәллек етмәй; **испусти́ть дух** йән сығыу, үлеү; **воспря́нуть ду́хом** ҡанатланып китеү, күңел күтәрелеп китеү; **ни слу́ху ни ду́ху** хәбәр-хәтерһеҙ (юғалыу); **пасть ду́хом** кәйеф төшөү, төшөнкөлөккә бирелеү; **что́бы ду́ху не́ было** *чьего*; **что́бы ду́хом не па́хло** *чьим* эҙе лә булмаһын, күҙгә күренмәһен, юҡ булһын

**ДУХИ́** *только мн.* хушбуй; **арома́т духо́в** хушбуй еҫе; **флако́н духо́в** бер һауыт хушбуй

**ДУХОВЕ́НСТВО** *с собир.* руханиҙар, дин башлыҡтары; **правосла́вное духове́нство** православие (христиан) руханиҙары; **мусульма́нское духове́нство** мосолман руханиҙары

**ДУХО́ВКА** *ж* духовка (*кухня плитаһында бешеренең мейесе*)

**ДУХО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** рухи; **духо́вный мир челове́ка** кешенең рухи донъяһы; **духо́вные запро́сы** рухи ихтыяж, талаптар; **духо́вные интере́сы** рухи мәнфәғәттәр; **духо́вная бли́зость** рухи яҡынлыҡ **2.** рухани, дини; **духо́вная семина́рия** дини семинария; **духо́вное лицо́** дин әһеле ♦ **духо́вное завеща́ние** яҙма васыят (*мөлкәт хаҡында*)

**ДУХОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *муз.* тынлы; **духово́й орке́стр** тынлы оркестр **2.** духовкалы; **духова́я печь** духовкалы мейес

**ДУХОТА́** *ж* **1.** (*спёртый воздух*) тынсыу(лыҡ), бөркөү(лек) **2.** (*знойный воздух*) эҫе(лек), ҡыҙыу(лыҡ), бөркөү(лек); **духота́ но́чи** төндөң бөркөүлеге

**ДУШ** *м* душ; **приня́ть душ** душта йыуыныу

**ДУША́** *ж* **1.** *филос.*, *рел.* йән, рух; **душа́ и те́ло** йән һәм тән; **душо́й и те́лом** йәне-тәне менән **2.** (*характер, внутренний мир человека*) йән, күңел, йөрәк; **до́брая душа́** изге күңелле; **чёрная душа́** ҡара йөрәк **3.** (*чувство, темперамент*) дәрт, хис, күңел; **вкла́дывать ду́шу** күңел биреү; **игра́ть с душо́й** күңел биреп уйнау **4.** *перен.* (*вдохновитель*) рухландырыусы, йәнләндереүсе, дәрт биреүсе; **душа́ коллекти́ва** йәм, дәрт биреүсе, коллективты йәнләндереүсе **5.** *разг.* (*человек*) кеше, зат, йән, йән эйәһе, йән башы; **на у́лице ни души́** урамда бер йән эйәһе лә юҡ; **на ду́шу населе́ния** йән башына **6.** *разг.* (*обращение*) йән кисәге, бәгер; **душа́ моя́** йән кисәгем, бәгерем ♦ **бума́жная душа́** ҡағыҙ йән, ҡағыҙ ратыусы, бюрократ; **за́ячья душа́** ҡуян йөрәк; **мёртвые ду́ши** үле (үлгән) йәндәр; **в душе́**: 1) күңелендә, эстән; 2) күңеле (йөрәге) менән; **взять (брать, приня́ть) на́ душу** өҫтөңә алыу (*яуаплылыҡ, гонаһ һ.б.*); **влеза́ть в душу** *кому, чью*: 1) ышанысына инеү, үҙенә ҡаратыу; 2) юхалап эс серен алыу; **вложи́ть ду́шу** *во что* бөтә күңелен (дәртен) һалыу; **всей душо́й**; **все́ми фи́брами души́** бөтә йөрәктән, ысын күңелдән; **в чём то́лько душа́ де́ржится** ныҡябыҡ, тире лә һөйәк; **говори́ть по душа́м** ихлас (ысын күңелдән, бөтә йөрәктән) һөйләшеү; **для души́** үҙ күңеле өсөн, үҙ күңелен уйлап; **душа́ боли́т** йөрәк әрней (һыҙлай); **душа́ нараспа́шку** бер ҡатлы, эсендәге тышында; **душа́ не лежи́т** *к кому-чему* күңел тартмай (ятмай); **душа́ не на ме́сте** *у кого* күңел болоҡһой (борсола); **душа́ ушла́ в пя́тки** *шутл.* ҡот осто, йән ус төбөнә килде; **душа́ челове́к** асыҡ күңелле кеше; **души́ не ча́ять** *в ком* өҙөлөп (өлтөрәп) тороу; **душа́ в ду́шу (жить)** дуҫ (татыу) йәшәү; **за душо́й ни копе́йки** (кеҫәлә) һуҡыр бер тин дә юҡ; **изли́ть ду́шу** эс бушатыу, эс серен һөйләү; **криви́ть душо́й** күңелгә хилаф итеү, ике йөҙләнеү; **на душе́ ко́шки скребу́т** *у кого* күңелдә ҡыра, күңел тынысһыҙ; **ни душо́й ни те́лом (не винова́т)** күңеле саф, тәне пак, бер ғәйебе юҡ; **отвести́ (изли́ть) ду́шу**: 1) (*высказаться*) күңел (эс) бушатыу; 2) күңел йыуатыу; **от всей души́** бөтә йөрәктән, ысын күңелдән; **по душе́** *кому в знач. сказ.* күңелгә оҡшай; **ско́лько душе́ уго́дно** йәнең теләгәнсә, йәнең күпме теләй; **стоя́ть (торча́ть) над душо́й** *чьей* теңкәгә (маҙаға) тейеп тороу, теңкәне ҡоротоу, йәнгә тейеү

**ДУШЕВА́Я** *ж* душ бүлмәһе

**ДУШЕВНОБОЛЬНО́Й** *м* аҡылдан яҙған, аҡылы зәғифләнгән ир-ат; **душевнобольна́я** *ж* аҡылдан яҙған, аҡылы зәғифләнгән ҡатын-ҡыҙ

**ДУШЕ́ВНОСТЬ** *ж* ихласлыҡ, асыҡлыҡ, алсаҡлыҡ

**ДУШЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күңел ...ы, рух ...ы, рухи; **душе́вная трево́га** күңел тынысһыҙлығы; **душе́вный подъём** күңел күтәренкелеге **2.** (*сердечный, искренний*) эскерһеҙ, ихлас, саф күңелдән; **душе́вный челове́к** ихлас кеше; **душе́вное отноше́ние** эскерһеҙ мөнәсәбәт; **душе́вный разгово́р** ихлас һөйләшеү ♦ **душе́вные боле́зни (заболева́ния)** психикаға (нервыға) бәйле ауырыуҙар

**ДУШЕВО́Й I,** -ая, -ое **1.** йән (кеше) башына уртаса; **объём душево́го потребле́ния** йән башына уртаса тотоноу күләме; **душево́е распределе́ние** йән башына уртаса бүленеш **2.** *ист.* душевой (*Рәсәйҙә крәҫтиәндәргә* (*тик ирҙәргә*) *йән башына бүленеп бирелгән*); **душево́й наде́л** душевой надел

**ДУШЕВО́Й II,** -ая, -ое душлы, душ …ы; **душево́й павильо́н** душлы павильон; **душева́я устано́вка** душ ҡулайламаһы

**ДУШЕГРЕ́ЙКА** *ж* йылы күкрәксә, еңһеҙ һырма

**ДУШЕГУ́БКА** *ж* душегубка (*кешеләрҙе газға тонсоҡтороп үлтереү өсөн фашистар тарафынан ҡулланылған көплө автомашина*)

**ДУ́ШЕНЬКА** *ж* **1.** *ласк. от* **душа́** 1—3; **2.** (*обращение*) йәнем, йән киҫәгем, йәнекәй

**ДУШЕРАЗДИРА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее үҙәк өҙгөс, ҡот осҡос; **душераздира́ющий крик** үҙәк өҙгөс тауыш

**ДУ́ШЕЧКА** *ж*; *разг. см.* **ду́шенька** 2

**ДУШЕЩИПА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.*, *ирон.* тәьҫирләндерә торған; **душещипа́тельный рома́н** күңел тәьҫирләндерә торған роман

**ДУШИ́СТЫЙ,** -ая, -ое хуш (тәмле) еҫле; **души́стая ли́па** хуш еҫле йүкә

**ДУШИ́ТЕЛЬ** *м*; *книжн.*, *уст.* быуыусы, ҡыҫыусы, юл ҡуймаусы (*кеше*); **души́тель свобо́ды** иректе быуыусы

**ДУШИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *кого* (*сдавливать горло*) быуыу, быуып үлтереү **2.** (*стеснять дыхание*) тынды ҡыҫыу (быуыу); **ка́шель ду́шит** йүтәл быуа **3.** *кого-что*; *перен.* ҡыҫыу, баҫыу, юл ҡуймау; **души́ть кри́тику** тәнҡитте ҡыҫыу; **души́ть свобо́ду** иректе ҡыҫыу ♦ **души́ть в объя́тиях** ныҡ ҡосаҡлау; **души́ть поцелу́ями** ебәрмәй оҙаҡ үбеү

**ДУШИ́ТЬ II** *несов. кого-что* хушбуй һөртөү (һибеү, һиптереү); **души́ть носово́й плато́к** ҡулъяулыҡҡа хушбуй һөртөү

**ДУШИ́ТЬСЯ I** *несов.* быуылыу, үҙен быуып үлтереү

**ДУШИ́ТЬСЯ II** *несов.* хушбуй һөртөнөү, хушбуйланыу

**ДУШИ́ЦА** *ж* мәтрүш, мәтрүшкә

**ДУ́ШНО 1.** *нареч.* тынсыу, бөркөү; **в ко́мнате ду́шно** бүлмәлә тынсыу **2.** *кому* и *без доп. в знач. сказ.*, *безл.* тын ҡыҫылыу (етмәү), тын бөтөү; **ему́ ду́шно** уның тыны ҡыҫыла

**ДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое тынсыу, бөркөү; **ду́шный во́здух** бөркөү һауа; **ду́шное помеще́ние** тынсыу бүлмә

**ДУШО́К** *м* боҙола (һөрһөй) башлаған; **мя́со с душко́м** һөрһөй башлаған ит

**ДУЭ́ЛЬ** *ж* дуэль (**1.** *ике кеше араһындағы дәғүәне атышыу йә ҡылыс менән хәл итеү* **2.** *күсм. ике кеше араһындағы көрәш, ярыш*); **вы́звать на дуэ́ль** дуэлгә саҡырыу; **слове́сная дуэ́ль** һүҙ ярышы, һүҙ көрәштереү

**ДУЭ́Т** *м*; *муз.* **1.** дуэт (*ике музыка ҡоралында уйнау өсөн йәки ике тауыштан йырлау өсөн яҙылған музыкаль әҫәр һәм ике башҡарыусынан торған ансамбль*) **2.** *в знач. нареч.* **дуэ́том**; *муз.* икәүләп (*ике тауыш менән йәки ике музыка ҡоралында*); **петь дуэ́том** дуэтта йырлау

**ДЫ́БА** *ж* дыба (*борон заманда кешенең кәүҙәһен тарттырып ҡаҙаҡлап, язалап үлтерә торған ҡулайлама*); **вздёрнуть на ды́бу** ҡаҙаҡҡа тарттырып язалау

**ДЫ́БОМ** *нареч.* үрә ♦ **во́лосы ста́ли (подняли́сь) ды́бом** сәстәр үрә торҙо

**ДЫБЫ́: встать на дыбы́**: 1) (*о лошади*) үрәпсеү, үрә тороу (баҫыу, һикереү); **ло́шадь вста́ла на дыбы́** ат үрә торҙо; 2) ҡарышыу, аяҡ терәп ҡаршы тороу, тыңламау

**ДЫ́ЛДА** *м* и *ж*; *прост.* һонтор, һуйылдай оҙон, һуҙан һуйыл, оҙон ашҡаҡ (*килбәтһеҙ оҙон кеше тураһында*)

**ДЫМ** *м* төтөн; **порохово́й дым** дары төтөнө; **таба́чный дым** тәмәке төтөнө; **клубы́ чёрного ды́ма** борҡоп сыҡҡан ҡап-ҡара төтөн ♦ **в дым** *прост.* бик ныҡ, эштән сығып; **дым коромы́слом (столбо́м)** аҫты-өҫкә килеү, тәртипһеҙлек; **нет ды́ма без огня́** елһеҙ япраҡ һелкенмәй, утһыҙ төтөн сыҡмай

**ДЫМА́РЬ** *м*; *пчел.* төтәткес

**ДЫМИ́ТЬ** *несов.* **1.** төтәү, төтәтеү, төтөн ҡайтарыу (сығарыу); **печь дыми́т** мейес төтәй; **заводска́я труба́ дыми́т** завод торбаһы төтөн сығара **2.** *чем* төтәтеү, төтөн сығарыу; **дыми́ть сигаре́той** сигарет төтәтеү

**ДЫМИ́ТЬСЯ** *несов.* төтәү, төтөнләү, төтөн сығарыу; **головёшка дыми́тся** торонбаш төтәп ята; **папиро́са дыми́тся** папиростың төтөнө сыға

**ДЫ́МКА** *ж* томанһыу, шыйыҡ томан; **верши́ны Ура́ла покры́ты ды́мкой** Урал түбәләре шыйыҡ томан менән ҡапланған

**ДЫ́МНЫЙ,** -ая, -ое төтөнлө, төтөн тулған; **ды́мная лачу́га** төтөнлө аласыҡ

**ДЫМОВО́Й,** -ая, -ое төтөн …ы, төтөн ебәрә (сығара) торған; **дымова́я труба́** мөрйә, мейес торбаһы; **дымова́я ша́шка** төтөн шашкаһы (пәрҙәһе) ♦ **дымова́я заве́са** *воен.* төтөн пәрҙәһе

**ДЫМОХО́Д** *м* (*в печи*) төтөн юлы, боҫлоҡ, ыҫлыҡ; (*в бане, юрте*) төтөнлөк, төнлөк, боҫлоҡ

**ДЫ́МЧАТЫЙ,** -ая, -ое төтөн төҫлө, күкһел, һорғолт, күкһел-һорғолт; **ды́мчатый кварц** күкһел кварц; **ды́мчатые очки́** һорғолт күҙлек

**ДЫ́НЯ** *ж* ҡауын

**ДЫРА́** *ж* тишек, йыртыҡ

**ДЫРОКО́Л** *м* ҡағыҙ тишкес

**ДЫ́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое тишек …ы, тишекле; **ды́рчатый кирпи́ч** тишекле кирбес

**ДЫРЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое тишек, йыртыҡ; **дыря́вый мешо́к** йыртыҡ тоҡ ♦ **дыря́вая голова**; **дыря́вая па́мять** хәтерһеҙ, тиҙ онотоусан, һыу мейе

**ДЫХА́НИЕ** *с* **1.** тын, һулыш, тын алыш, һулыш алыу; **затруднённое дыха́ние** ауыр тын алыу; **иску́сственное дыха́ние** *мед.* яһалма һулыш алдырыу; **о́рганы дыха́ния** тын алыу ағзалары **2.** *перен.* (*веяние*) һулыш; **дыха́ние о́сени** көҙ һулышы ♦ **второ́е дыха́ние** икенсе

һулыш, яңынан хәл инеү (*арып хәл бөткәндән һуң көс инеп киткәндә*); **до после́днего дыха́ния** һуңғы һулышҡа тиклем, үлгәнсе; **не переводя́ дыха́ния** бер тынала, туҡтауһыҙ, тын да алмай

**ДЫХА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* тын, тын алыу ...ы, һулыш ...ы; **дыха́тельные пути́** тын алыу юлдары; **дыха́тельный центр** тын алыу үҙәге

**ДЫХНУ́ТЬ** *сов.*; *прост. см.* **дохну́ть**

**ДЫША́ТЬ** *несов.* **1.** тын (һулыш) алыу, һулау, тын өрөү; **легко́ дыша́ть** тын алыуы еңел; **дыша́ть све́жим во́здухом** саф һауа һулау; **е́ле-е́ле дыша́ть** саҡ-саҡ тын алыу **2.** *чем*; *перен.* аңҡып (бөркөлөп, ташып) тороу; **печь ды́шит жа́ром** мейестән эҫе бөркөлөп тора; **его́ лицо́ дыша́ло мо́лодостью** уның йөҙөнән йәшлек дәрте ташып тора ♦ **дыша́ть здоро́вьем** таҙалығы тышҡа (йөҙөнә) сыҡҡан; **дыша́ть во́здухом** *чего, каким* бер даирә (мөхит) кешеләре менән аралашыу; **дыша́ть на ла́дан** хәл өҫтөндә булыу (ятыу)

**ДЫША́ТЬСЯ: легко́ ды́шится** тын алыуы еңел (иркен); **тяжело́ дыша́лось** тын алыш ауыр, һулыш (тын) ҡыҫыла

**ДЫ́ШЛО** *с* һыңар тәртә (*фургонда, ҙур арбала*)

**ДЬЯ́ВОЛ** *м* иблис, шайтан ♦ **како́го дья́вола** ни шайтаныма, ни бысағыма

**ДЬЯ́ВОЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** иблис ...ы, шайтан ...ы; **дья́вольское наважде́ние** иблис вәсвәсәһе, шайтан ҡотҡоһо **2.** *перен.* яуыз, мәкерле; **дья́вольский у́мысел** яуыз ниәт **3.** *разг.* (*необычайно сильный, трудный*) ҡот осҡос, иҫ киткес; **дья́вольская си́ла** ҡот осҡос көс; **дья́вольский хара́ктер** иҫ киткес (ауыр, көслө) холоҡ

**ДЬЯ́ВОЛЬЩИНА** *ж*; *разг.* аңлашылмаусылыҡ, буталсыҡлыҡ, хикмәт, әкәмәт

**ДЬЯК** *м*; *ист.* дьяк (*элекке Рәсәйҙә дәүләт учреждениеларында яуаплы эш башҡарыусы*)

**ДЬЯ́КОН** *м* дьякон (*сиркәүҙә священникка ярҙам итеүсе хеҙмәткәр*)

**ДЬЯЧО́К** *м* дьячок (*түбән дәрәжәләге сиркәү хеҙмәтсеһе*)

**ДЮ́ЖИЙ,** -ая, -ее *прост.* мыҡты, ҙур кәүҙәле; **дю́жий па́рень** мыҡты егет

**ДЮ́ЖИНА** *ж* дюжина, ун ике (бер иш) дана; **дю́жина домо́в** ун ике бер иш йорт ♦ **чёртова дю́жина** ун өс һаны (*уңышһыҙ һаналған һан*)

**ДЮ́ЖИННЫЙ,** -ая, -ое ябай, уртаса; **дю́жинный челове́к** ябай кеше

**ДЮЙМ** *м* дюйм (*элекке оҙонлоҡ үлсәү берәмеге — 2,54 сантиметр*)

**ДЮЙМО́ВЫЙ,** -ая, -ое бер дюймлы; **дюймо́вый гвоздь** бер дюймлы ҡаҙаҡ

**ДЮ́ННЫЙ,** -ая, -ое дюна ...ы; **дю́нный песо́к** дюна ҡомо

**ДЮ́НЫ** *мн.* (*ед.* **дю́на** *ж*) дюналар (*диңгеҙ ярҙары буйында ел менән күсеп йөрөгән ҡом өйөмдәре*)

**ДЮРАЛЮМИ́НИЕВЫЙ,** -ая, -ое дюралюминий ...ы, дюралюмин; **дюралюми́ниевая про́волока** дюралюмин сым

**ДЮРАЛЮМИ́НИЙ** *м* дюралюминий, дюралюмин (*алюминдың еҙ, магний һәм кремний менән ҡушылмаһы*)

**ДЮШЕ́С** *м* дюшес (*грушаның йомшаҡ тәмле сорты*)

**ДЯ́ГИЛЬ** *м* айыу ҡурайы, шыма көпшә

**ДЯ́ДЕНЬКА** *м* (*форма обращения*) *см.* **дя́дя**

**ДЯ́ДЯ** *м* **1.** (*младший брат отца, матери*) ағай; (*старший брат отца, матери*) бабай, олатай; **2.** (*форма обращения*) ағай

**ДЯ́ТЕЛ** *м*; тумыртҡа

**ДЯ́ТЛОВЫЙ,** -ая, -ое тумыртҡа ...ы; **дя́тловые я́йца** тумыртҡа йомортҡалары

# Е, Ё

**ЕВА́НГЕЛИЕ** *с* Инжил (*христиандарҙың дини китабы*)

**ЕВА́НГЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое Инжил ...ы; **ева́нгельский текст** Инжил тексы

**ЕВГЕ́НИКА** *ж* евгеника (*кешенең нәҫел сифаттары насарайыу мөмкинлеген иҫкәртеү тураһындағы тәғлимәт*)

**Е́ВНУХ** *м* алашар, евнух (*һәрәмдә хеҙмәт итеү өсөн енес биҙҙәре алынған ир-ат*)

**ЕВРЕ́И** *мн.* йәһүдтәр, йәһүд халҡы // *ед.* **евре́й** *м* йәһүд ир-аты; **евре́йка** *ж* йәһүд ҡатын-ҡыҙы

**ЕВРЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое йәһүд ...ы; **евре́йский наро́д** йәһүд халҡы

**ЕВРОПЕ́ЕЦ** *м* европалы, Европа кешеһе

**ЕВРОПЕИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **европеизи́ровать, европеизи́роваться**

**ЕВРОПЕИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* европалаштырыу, европалаштырылыу

**ЕВРОПЕИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* европалашыу **2.** *несов. страд. от* **европеизи́ровать**

**ЕВРОПЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Европа ...ы; **европе́йские стра́ны** Европа илдәре; **европе́йский кли́мат** Европа климаты

**ЕВРОПЕО́ИД** *м*; *антроп.* европеоид (*раса тибы*)

**ЕВРОПЕО́ИДНЫЙ: европео́идная ра́са** *антроп.* европеоид расаһы

**Е́ГЕРЬ** *м* егерь (**1.** *профессиональ һунарсы* **2.** *иҫк. ҡайһы бер Европа илдәрендә уҡсылар полкында хеҙмәт иткән һалдат*)

**ЕГИ́ПЕТСКИЙ,** -ая, -ое мысыр ...ы, Мысыр ...ы; **еги́петский хло́пок** мысыр мамығы; **еги́петский фарао́н** Мысыр фирғәүене; **еги́петские пирами́ды** Мысыр пирамидалары ♦ **еги́петская рабо́та** иң ауыр, хәлдән тайҙырғыс эш

**ЕГИПТО́ЛОГ** *м* египтолог (*белгес*)

**ЕГИПТОЛО́ГИЯ** *ж* египтология (*Боронғо Мысырҙың тарихын, иҡтисадын, телен, сәнғәтен һ.б. өйрәнә торған фән*)

**ЕГИПТЯ́НЕ** *мн.* мысырлылар, мысыр халҡы // *ед.* **египтя́нин** *м* мысырлы, мысыр ир-аты; **египтя́нка** *ж* мысыр ҡатын-ҡыҙы

**ЕГОЗА́** *м* и *ж*; *разг.* тиктормаҫ, осоҡ, тынғыһыҙ

**ЕГОЗИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** тик тормау, тынғыһыҙланыу, тынысһыҙланыу, осоҡланыу **2.** *перен.* (*угодничать*) ялағайланыу, ҡуштанланыу

**ЕДА́** *ж* **1.** аш, ашау; **пе́ред едо́й** ашау алдынан; **по́сле еды́** аштан һуң; **во вре́мя еды́** ашағанда, ашаған ваҡытта **2.** *разг.* (*пища*) ашамлыҡ, аҙыҡ, ризыҡ; **вку́сная еда́** тәмле ашамлыҡ; **пита́тельная еда́** туҡлыҡлы аҙыҡ

**ЕДВА́** *нареч.* и *союз* **1.** *нареч.* (*насилу, с трудом*) көскә, көскә-көскә; **я едва́ дошёл до до́му** мин өйгә көскә ҡайтып еттем **2.** *нареч.* (*чуть, совсем немного, слегка*) саҡ ҡына, саҡ-саҡ, аҙ ғына, яҙыу; **я едва́ не упа́л** йығыла яҙҙым; **едва́ освещённая ко́мната** саҡ ҡына яҡтыртылған бүлмә; **едва́ жив** саҡ ҡына йәне бар, йәне сығырға ғына тора **3.** *союз* (*лишь только, как только*) да/дә, -ыу/-еү менән, -ғас та/-гәс тә; **едва́ он вошёл, как на́чал говори́ть** ул инеү менән һөйләй башланы ♦ **едва́ ли** айһай, булырмы икән, белмәйем; **едва́ ли не** тип әйтерлек, тиерлек

**ЕДИНЕ́НИЕ** *с* берләшеү, берлек, берҙәмлек; **в едине́нии — си́ла** берҙәмлектә — көс; **едине́ние масс в борьбе́ за мир** тыныслыҡ өсөн көрәштә халыҡтарҙың берләшеүе

**ЕДИНИ́ЦА** *ж* **1.** *мат.* бер, берәмек(тәр) берлек, бер һаны **2.** (*оценка*) берле, бер билдәһе; **получи́ть едини́цу по матема́тике** математиканан бер билдәһе алыу **3.** (*величина, которой измеряются др. однородные величины*) берәмек; **едини́ца ве́са** ауырлыҡ берәмеге; **де́нежная едини́ца** аҡса берәмеге; **едини́ца си́лы то́ка** ток көсө берәмеге **4.** *обычно с определением* (*отдельная часть в составе целого*) берәмек; **хозя́йственная едини́ца** хужалыҡ берәмеге; **шта́тные едини́цы** штат берәмектәре **5.** *мн.* **едини́цы** (*немногие*) айырым кешеләр, ҡайһы берәүҙәр; **то́лько едини́цы не выполня́ют план** ҡайһы берәүҙәр генә план үтәмәй

**ЕДИНИ́ЧНОСТЬ** *ж* берҙән-бер, берҙән-бер генә булыу, һирәк; **едини́чность явле́ний** һирәк күренештәр

**ЕДИНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙенә (бер) башҡа, һирәк осрай торған, берҙән-бер, бер генә; **едини́чный слу́чай** берҙән-бер ваҡиға **2.** (*отдельный, обособленный*) айырым бер, айырылып торған; **едини́чное явле́ние** айырым бер күренеш

**ЕДИНО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "бер", "берлек", "берҙәм" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **единобра́чный** бер никахлы; **единогла́сное мне́ние** берҙәм фекер

**ЕДИНОБО́ЖИЕ** *с* бер аллалыҡ, бер аллаға табыныу

**ЕДИНОБО́РСТВО** *с* бергә-бер көрәш (алыш), бер үҙе (яңғыҙ) ҡаршы тороу (көрәшеү, алышыу); **вступи́ть в единобо́рство** бергә-бер алышҡа сығыу

**ЕДИНОБРА́ЧИЕ** *с* бер никахлыҡ

**ЕДИНОБРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бер никахлы

**ЕДИНОВЕ́РЕЦ** *м* и **ЕДИНОВЕ́РКА** *ж* бер дин кешеһе, диндәш (*кем менәндер*)

**ЕДИНОВЕ́РИЕ** *с* бер дин тотоу, бер динлек диндәшлек (*кем менәндер*)

**ЕДИНОВЛА́СТИЕ** *с* властың бер ҡулда булыуы, бер властлылыҡ; **установи́ть единовла́стие** бер властлылыҡ урынлаштырыу

**ЕДИНОВЛА́СТНЫЙ,** -ая, -ое власты бер үҙе тотҡан, власть берәү ҡулында булған; **единовла́стный прави́тель** власты бер үҙе тотҡан хаким; **единовла́стное правле́ние** власть берәү ҡулында булған идара

**ЕДИНОВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое бер тапҡыр (мәртәбә) бирелә торған; **единовре́менное посо́бие** бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам

**ЕДИНОГЛА́СИЕ** *с* берҙәмлек, бер фекерҙә булыу; **доби́ться единогла́сия** берҙәмлеккә ирешеү

**ЕДИНОГЛА́СНЫЙ,** -ая, -ое бер тауыштан, берҙәм; **единогла́сное реше́ние** бер тауыштан ҡабул ителгән ҡарар; **единогла́сное избра́ние** бер тауыштан һайланыу

**ЕДИНОДУ́ШИЕ** *с* күңел (уй, фекер) берлеге, бер фекерҙә (уйҙа, һүҙҙә) булыу, берҙәмлек; **прояви́ть единоду́шие** берҙәмлек күрһәтеү

**ЕДИНОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое берҙәм, бер күңелдән булған; **единоду́шное одобре́ние** берҙәм хуплау

**ЕДИ́НОЖДЫ** *нареч.*; *уст.* **1.** (*один раз*) бер тапҡыр (мәртәбә); **еди́ножды в жи́зни** ғүмергә бер тапҡыр **2.** (*однажды*) берҙән-бер ваҡыт, бер тапҡыр (мәл)

**ЕДИНОКРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* **1.** аталаш, ата бер, инә башҡа; **единокро́вные бра́тья** аталаш (ир) туғандар **2.** ҡәрҙәш; **единокро́вные наро́ды** ҡәрҙәш халыҡтар

**ЕДИНОЛИ́ЧНИК** *м* яңғыҙаҡ; **хозя́йство единоли́чника** яңғыҙаҡ хужалығы

**ЕДИНОЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** берәү башҡара торған, үҙе генә ҡулында тотҡан, бер генә кеше-

нең ҡулына бирелгән; **единоли́чная власть** бер генә кешенең ҡулына бирелгән власть **2.** яңғыҙаҡ …ы; **единоли́чное крестья́нское хозя́йство** яңғыҙаҡ крәҫтиән хужалығы

**ЕДИНОМЫ́СЛИЕ** *с* фекерҙәшлек, фекер (ҡараш) берлеге, бер фекерлелек

**ЕДИНОМЫ́ШЛЕННИК** *м* **1.** фекерҙәш; **сою́з единомы́шленников** фекерҙәштәр берлеге **2.** (*сообщник*) тарафдар, ҡатнашыусы (*берәй йәшерен эштә*)

**ЕДИНОНАЧА́ЛИЕ** *с* берәүҙең идара итеүе, бер башлыҡлылыҡ; **при́нцип единонача́лия** бер башлыҡлылыҡ принцибы

**ЕДИНООБРА́ЗИЕ** *с* бер төрлөлөк (төҫлөлөк, рәүешлелек); **единообра́зие в оде́жде** кейемдәге бер төрлөлөк

**ЕДИНООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое бер төрлө (төҫлө, рәүешле); **единообра́зная систе́ма учёта** иҫәпләүҙең бер төрлө системаһы

**ЕДИНОПЛЕМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* бер ҡәбилә …ы, бер милләт

**ЕДИНОРО́Г** *м* һыңармөгөҙ (*диңгеҙ хайуаны*)

**ЕДИНОУТРО́БНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* әсәләш (инәләш), инә бер, ата башҡа; **единоутро́бные бра́тья** әсәләш (ир) туғандар

**ЕДИ́НСТВЕННО 1.** *нареч. см.* **еди́нственный** 1; **2.** *в знач. частицы* (*при выделении, ограничении в значении "только", "исключительно"*) тик, бары, бары тик, фәҡәт; **мы обя́заны еди́нственно ему́** беҙ фәҡәт уға ғына бурыслы

**ЕДИ́НСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** бер генә, берҙән-бер, бер бөртөк; **еди́нственный ребёнок** бер генә бала; **еди́нственная подру́га** берҙән-бер әхирәт **2.** *перен., уст.* (*замечательный*) бик яҡшы (шәп), иң киткес һәйбәт (яҡшы), (донъяла) берҙән-бер; **еди́нственный челове́к** донъяла берҙән-бер кеше ♦ **еди́нственное число́** *грам.* берлек, берлек һан

**ЕДИ́НСТВО** *с* **1.** берҙәмлек, берлек **2.** (*неразрывность, взаимная связь*) берҙәмлек, үҙ-ара бәйләнеш; **еди́нство тео́рии и пра́ктики** теория менән практиканың берҙәмлеге **3.** (*общность*) берлек, дөйөмлөк, уртаҡлыҡ, оҡшашлыҡ, берҙәмлек; **вну́треннее еди́нство** *чего-л. ниҙең дә булһа* эске берлеге; **еди́нство взгля́дов** ҡараштар уртаҡлығы; **еди́нство мне́ний** фекерҙәр берлеге; **еди́нство интере́сов** мәнфәғәттәр(ҙең) дөйөмлөгө (оҡшашлығы)

**ЕДИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*один*) бер, бер ҙә, бер генә лә; **на не́бе ни еди́ного о́блака** күктә бер генә лә болот юҡ; **еди́ное це́лое** бер бөтөн **2.** (*нераздельный*) берҙәм, тулы, бүленмәҫ; **еди́ное мне́ние** берҙәм фекер; **еди́ное госуда́рство** бүленмәҫ дәүләт; **еди́ный фронт** берҙәм фронт **3.** (*общий, одинаковый*) бер (үк) төрлө, (бөтөнөһөнә лә) уртаҡ; **еди́ные це́ны** уртаҡ хаҡтар; **еди́ная пози́ция** бер төрлө позиция (ҡараш) ♦ **все до еди́ного** барыһы ла, һәммәһе лә, береһе лә ҡалмайынса

**Е́ДКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*разъедающий*) зәһәр, ашай (киҫә, уя, яндыра) торған, асы, әсе, танау ярырлыҡ; **е́дкая кислота́** зәһәр кислота; **е́дкий натр** зәһәр натр; **е́дкий дым** әсе төтөн; **е́дкий за́пах** танау ярырлыҡ еҫ **2.** *перен.* зәһәр, уҫал, әсе; **е́дкая иро́ния** әсе көлөү

**Е́ДКОСТЬ** *ж* **1.** зәһәрлек; **е́дкость кислоты́** кислота зәһәрлеге **2.** әселек; **е́дкость ды́ма** төтөн әселеге **3.** *перен.* зәһәрлек, уҫаллыҡ, сәнскелелек; **е́дкость сати́ры** сатира уҫаллығы

**ЕДО́К** *м* **1.** йән (кеше) башы (*ризыҡ бүлгәндә иҫәпкә инә торған берәмек*); **распредели́ть проду́кты по едока́м** аҙыҡты йән башына бүлеү **2.** *разг.* ашаусы, тамаҡ; **у нас приба́вился ещё оди́н едо́к** беҙҙә тағы бер тамаҡ артты; **в семье́ три едока́** ғаиләлә өс тамаҡ **3.** *разг.* (*любитель плотно поесть*) күп ашаусы, ашамһаҡ

**ЁЖ** *м* **1.** терпе **2.** *воен.* ёж (*пехотаға һәм танкыларға ҡаршы тотҡарлыҡ*)

**ЕЖЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һәр", "һәр бер" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **ежего́дный** һәр йыл һайын

**ЕЖЕВЕЧЕ́РНИЙ,** -яя, -ее кис һайын, һәр кис; **ежевече́рняя прогу́лка** һәр кис саф һауала йөрөү; **ежевече́рняя репети́ция** кис һайын була торған репетиция

**ЕЖЕВИ́КА** *ж* ҡара бөрлөгән

**ЕЖЕВИ́ЧНИК** *м* ҡара бөрлөгәнлек

**ЕЖЕВИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡара бөрлөгән …ы; **ежеви́чный куст** ҡара бөрлөгән ҡыуағы; **ежеви́чное варе́нье** ҡара бөрлөгән ҡайнатмаһы

**ЕЖЕГО́ДНИК** *м* йыллыҡ баҫма, йылына бер тапҡыр сыға торған; **археографи́ческий ежего́дник** археография буйынса йыллыҡ баҫма

**ЕЖЕГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое һәр йыл(ғы), йыл һайын(ғы), һәр йыл (йыл да) була торған; **ежего́дный о́тпуск** һәр йылғы ял; **ежего́дная реви́зия** йыл да була торған ревизия

**ЕЖЕДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көндәлек, (һәр) көн һайын; **ежедне́вная газе́та** көндәлек гәзит **2.** ғәҙәттәге, көндәлек; **ежедне́вные забо́ты** көндәлек мәшәҡәттәр

**ЕЖЕМЕ́СЯЧНИК** *м* айлыҡ (журнал), ай һайын (айына бер тапҡыр) сыға торған

**ЕЖЕМЕ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое айлыҡ, ай һайын; **ежеме́сячный журна́л** айлыҡ журнал; **ежеме́сячный отчёт** айлыҡ отчёт (иҫәп-хисап)

**ЕЖЕМИНУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое минут һайын, һәр минутта

**ЕЖЕНЕДЕ́ЛЬНИК** *м* аҙналыҡ (*журнал, гәзит*)

**ЕЖЕНЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аҙналыҡ, аҙна һайын (һәр аҙнаға бер тапҡыр) сыға (баҫыла) торған; **еженеде́льный журна́л** аҙналыҡ журнал

**ЕЖЕСЕКУ́НДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** секунд һайын, һәр секундта **2.** бер туҡтауһыҙ, өҙлөкһөҙ; **ежесеку́ндный сигна́л** бер туҡтауһыҙ сигнал

**ЕЖЕСУ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое тәүлек һайын, һәр тәүлектә; **ежесу́точное дежу́рство** тәүлек һайын булған дежурлыҡ

**ЕЖЕЧА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәғәт һайын, һәр сәғәттә **2.** һәр ваҡыт, йыш; **ежеча́сная опа́сность** һәр ваҡыттағы ҡурҡыныс

**ЁЖИК** *м* **1.** *уменьш.-ласк. от* **ёж** 1; **2.** *чего* тырпай сәс (*алдырыу төрө*) **3.** *в знач. нареч.* **ёжиком** тырпайтып; **стри́чься ёжиком** сәсте тырпайтып алдырыу

**ЁЖИТЬСЯ** *несов.* **1.** бөршәйеү, шоҡрайыу, көжрәйеү, ҡорошоу; **ёжиться от хо́лода** һыуыҡтан шоҡрайыу; **ходи́ть съёжившись** көжрәйеп йөрөү **2.** *перен., разг.* (*стесняться*) оялыу, тартыныу, уңайһыҙланыу

**ЕЖИ́ХА** *ж* инә терпе

**ЕЖО́ВЫЙ,** -ая, -ое терпе ...ы; **ежо́вые и́глы** терпе энәләре ♦ **держа́ть в ежо́вых рукави́цах** *кого* ҡаты тотоу, ҡаты ҡуллылыҡ күрһәтеү

**ЕЖО́НОК** *м* терпе балаһы, бала терпе

**ЕЗДА́** *ж* **1.** *см.* **е́здить**; **верхова́я езда́** һыбай йөрөү; **бы́страя езда́** тиҙ йөрөү **2.** (*мера расстояния*) юл, ара; **в трёх часа́х езды́ от го́рода** ҡаланан өс сәғәтлек юл

**Е́ЗДИТЬ** *несов.* **1.** йөрөү, йөрөп тороу, барыу, барып йөрөү; **ча́сто е́здить в го́род** ҡалаға йыш барып йөрөү; **е́здить на рабо́ту на трамва́е** эшкә трамвай менән йөрөү; **е́здить в го́сти** ҡунаҡҡа йөрөү **2.** (*уметь пользоваться средством передвижения*) йөрөү, йөрөй белеү; **он е́здит на мотоци́кле** ул мотоциклда йөрөй **3.** *перен., разг.* шыуып йөрөү; **седло́ е́здит** эйәр шыуып йөрөй ♦ **е́здить (верхо́м) на** *ком* елкәгә ултырыу, елкәне кимереү (иҙеү)

**Е́ЗДКА** *ж*; *спец., разг.* барыу; **дрова́ мо́жно привезти́ в одну́ е́здку** утынды бер барыуҙа килтерергә мөмкин

**ЕЗДОВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*ходящий в упряжке — о животных*) екке, еген; (*предназначенный для передвижения верхом*) менге; **ездова́я ло́шадь** менге ат; **ездовы́е соба́ки** екке эттәр **2.** *в знач. сущ.* **ездово́й** *м* ат тотоусы (*артиллерияла пушка арбаһының күсере*)

**ЕЗДО́К** *м* **1.** һыбай барыусы, яйҙаҡ, һыбайлы; **запозда́лый ездо́к** һуңға ҡалған һыбайлы **2.** һыбай йөрөй белеүсе, һыбай йөрөү оҫтаһы; **он хоро́ший ездо́к** ул һыбай йөрөүгә оҫта, ул һыбай йөрөү оҫтаһы; **он отли́чный ездо́к на велосипе́де** ул велосипедта йөрөүгә оҫта

**Е́ЗЖЕНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*приученный к езде*) егергә (һыбай йөрөргә) өйрәтелгән; **е́зженый конь** егергә өйрәтелгән ат **2.** (*наезженный*) йөрөлгән, тапалған; **е́зженая доро́га** тапалған юл

**ЕЙ-БО́ГУ** *межд.*; *разг.* валлаһи, билләһи, ысындан да, ысынлап та

**ЕЙ-Е́Й** *межд.*; *прост. см.* **ей-бо́гу**

**ЁКАНЬЕ** *с см.* **ёкать** 1

**ЁКАТЬ** *несов.* **1.** (*издавать звуки, напоминающие икоту*) уңҡ-уңҡ итеү (килеү), уңҡылдау, өңкөлдәү **2.** *разг.* (*замирать — о сердце*) жыу итеү; **се́рдце ёкнуло** йөрәк жыу итеп ҡалды

**Е́ЛЕ** *нареч.* **1.** (*едва*) көскә генә, саҡ ҡына, әҙ генә; **е́ле жив** әҙ генә йәне бар; **е́ле слышны́ зву́ки кура́я** ҡурай тауышы саҡ ҡына ишетелеп ҡала **2.** (*с трудом, насилу*) көскә, көс-хәл менән, саҡ-саҡ (ҡына); **я е́ле мог подня́ть я́щик** мин йәшникте көскә күтәрә алдым

**Е́ЛЕ-Е́ЛЕ** *нареч.* көскә-көскә (генә), саҡ-саҡ (ҡына) ♦ **е́ле-е́ле душа́ в те́ле** *прост.* йәне сығырға тора, сыҡмаған йәне генә ҡалған, йәне ус төбөндә генә (*хәлһеҙ йәки ауырыу кешегә ҡарата*); таралырға (емерелергә) тора (*нәмәгә ҡарата*)

**ЕЛЕ́Й** *м* **1.** *церк.* зәйтүн майы **2.** *перен.* күңел йыуатҡыс, йән аҙығы

**ЕЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое хәйләле, сөсө, йомаҡай, юха; **еле́йная речь** сөсө телмәр; **еле́йный го́лос** хәйләле тауыш; **еле́йное выраже́ние лица́** йомаҡай сырай

**ЕЛИ́КО** *нареч.*; *книж., уст.* (*обычно в сочет. с "возможно" и "мочь"*) *см.* **наско́лько**; **ели́ко возмо́жно** мөмкин ҡәҙәр, мөмкин булғанса, ҡулдан килгәнсә; **ели́ко хвата́ло сил** көс еткәнсә

**ЁЛКА** *ж* **1.** *см.* **ель 2.** (*праздник*) ёлка, шыршы байрамы; **новогоდняя ёлка** Яңы йыл ёлкаһы; **быть на ёлке** ёлкала булыу

**ЕЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** шыршы ...ы; **ело́вая ши́шка** шыршы тубырсығы **2.** шыршы, шыршынан; **ело́вая доска́** шыршы таҡта; **ело́вый стол** шыршы өҫтәл

**ЁЛОЧКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **ёлка 2.** *в знач. нареч.* **ёлочкой**; **в ёлочку** кәкерсәкле, кәкерсәкләп; **руба́шка, вы́шитая ёлочкой** кәкерсәкләп сигелгән күлдәк; **парке́т, вы́ложенный ёлочкой** кәкерсәкләп һалынған паркет

**ЁЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое ёлка ...ы; **ёлочные украше́ния** ёлка биҙәүестәре (уйынсыҡтары); **ёлочные све́чи** ёлка шәмдәре

**ЕЛЬ** *ж* шыршы ♦ **сиби́рская ель** себер шыршыһы

**Е́ЛЬНИК** *м* **1.** шыршылыҡ, шыршы урманы, бешәлек; **молодо́й е́льник** йәш шыршылыҡ **2.** *собир.* йәйек, шыршы йәйеге; **настла́ть на зе́млю е́льника** ергә шыршы йәйеген түшәү

**ЁМКИЙ,** -ая, -ое һыйышлы, һыйҙырышлы; **ёмкая посу́да** (күп) һыйҙырышлы һауыт

**ЁМКОСТЬ** *ж* **1.** һыйҙырыш, һыйышлы, һыйҙыра алыу дәрәжәһе; **буты́ль ёмкостью в три ли́тра** өс литр һыйышлы шешә **2.** *мн.* **ёмкости**; *спец.* һыйым, һыйышлы (һауыт); **ёмкости с горю́чим** яғыулыҡ һалынған һыйышлыҡтар ♦ **ёмкость ры́нка** *эк.* баҙар аша тауар һата алыу мөмкинлеге; **ме́ры ёмкости** һыйым үлсәүҙәре (*шыйыҡ һәм бөртөклө нәмәләрҙең күләмен үлсәү берәмектәре*)

**ЕНО́Т** *м* (*зверь и его мех*) янут, урман эте

**ЕНО́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** янут ...ы; **ено́товый мех** янут тиреһе **2.** янут, януттан; **ено́товая шу́ба** янут тун

**ЕПАНЧА́** *ж* ябынса (*киң оҙон плащ кеүек боронғо кейем*)

**ЕПА́РХИЯ** *ж* епархия (*епископ ҡул аҫтындағы дини хакимиәт өлкәһе*)

**ЕПИ́СКОП** *м* епископ (*христиан динендә юғары рухани дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше*)

**ЕРАЛА́Ш** *м*; *разг.* тәртипһеҙлек, бола, буталсыҡлыҡ; **устро́ить ерала́ш** тәртипһеҙлек ҡуптарыу (болартып ташлау)

**Е́РЕСЬ** *ж* **1.** ересь, мөртәтлек (*өҫтөнлөк итеп килгән дин ҡанундарына ҡаршы булған дини тәғлимәт*) **2.** *перен.*, *разг.* (*чепуха*) юҡбар (буш, мәғәнәһеҙ) һүҙ, сафсата; **нести́ е́ресь** буш һүҙ һөйләү

**ЕРЕТИ́К** *м* еретик, мөртәт (*ересь яҡлы кеше*)

**ЁРЗАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** тик ултырмау, борғоланыу, останлау **2.** бер урында тормау, шыуып йөрөү, шыуышыу; **га́лстук ёрзает по ше́е** галстук муйында шыуып йөрөй

**Е́РИК** *м*; *разг.* йырын, йырмаҡ; **вода́ в е́рике чи́стая** йырындағы һыу таҙа

**ЕРМО́ЛКА** *ж* ермолка (*түбәтәй кеүек баш кейеме*); **наде́ть ермо́лку** ермолка кейеү

**ЕРО́ШИТЬ** *несов. что*; *разг.* **1.** *разг.* өлпәйтеү, өлпөрәү, тырпайтыу (*сәсте, һаҡалды*); **еро́шить во́лосы** сәсте өлпәйтеү **2.** ҡабартыу (*ҡауырһынды, йөндө*); **бе́ркут еро́шит пе́рья на спине́** бөркөт һырт йөндәрен ҡабарта

**ЕРО́ШИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* өлпәйеү, тырпайыу; **во́лосы еро́шились** сәстәре тырпайып тора

**ЕРУНДА́** *ж*; *разг.* **1.** сафсата, буш (юҡ-бар) һүҙ; **говори́ть ерунду́** сафсата һатыу, бушты һөйләү **2.** (*пустяки*) еңел (анһат) нәмә, юҡ-бар; **научи́ться пла́вать — су́щая ерунда́** йөҙөргә өйрәнеү анһат

**ЁРШ** *м* **1.** *зоол.* (*рыба*) этеш, шырт балыҡ; **уди́ть ерша́** этеш ҡаптырыу **2.** (*щётка*) ҡыл бумала; **ла́мповое стекло́ чи́стят ершо́м** шәм ҡыуығын ҡыл бумала менән таҙарталар

**ЕРШИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*о волосах*) тырпайып торған, тырпайған, тырпай; **ерши́стые во́лосы** тырпайған сәс **2.** *перен.* (*неуступчивый*) үҙ һүҙле, еңмеш; **ерши́стый челове́к** үҙ һүҙле кеше

**ЕРШИ́ТЬ** *несов.*; *разг. см.* **еро́шить** 2

**ЕРШИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** тырпайып тороу (*сәскә ҡарата*) **2.** *перен.* (*горячиться*) ярһып (ҡыҙып) китеү, үҙһүҙләнеү, еңмешләнеү

**ЕРШО́ВЫЙ,** -ая, -ое этеш ...ы, шырт балыҡ ...ы; **ершо́вая уха́** этеш һурпаһы

**ЕСАУ́Л** *м* яҫауыл (*революцияға тиклем Рәсәйҙә хәрби казактарға бирелгән офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше*); **каза́чий есау́л** казак яҫауылы

**Е́СЛИ** *союз* **1.** әгәр -һа/-һә, -һа/-һә икән, әгәр -һа/-һә; **е́сли бы знал, он не сде́лал бы э́того** әгәр ул белгән булһа, быны эшләмәҫ ине

**2.** (*в сочет. с частицами "и", "же", "даже"*) -һа ла/-һә лә, -ған/-гән хәлдә лә (иҫәптә лә); **е́сли да́же он дово́лен, то никогда́ не пока́жет э́того** ул ҡәнәғәт булған хәлдә лә, һис белгертмәйәсәк

**3.** (*в сочет. с частицей "бы"*) -ған/-гән булһа, -һа/-һә ине; **е́сли бы я знал, то не пришёл бы** белгән булһам, килмәҫ инем; **е́сли бы мне ещё раз услы́шать твой го́лос** һинең тауышыңды тағы бер тапҡыр ишетһәм ине ♦ **е́сли бы** әгәр ҙә; **е́сли (и) не ..., то (так)** булмаһа ла, -маһа/-мәһә; **е́сли бы да кабы́** әгәр ҙә мәгәр, улай ҙа былай; **е́сли (уж) на то пошло́** *в знач. вводн. сл.* улай булһа, эш улайға киткән икән, улай икән; **е́сли хоти́те (хо́чешь)** *в знач. вводн. сл.* ихтимал, бығай

**ЕСТЕ́СТВЕННО** **1.** *нареч.* тәбиғи, ҡәҙимге(сә), ғәҙәттәге(сә); **вести́ себя́ есте́ственно** үҙеңде тәбиғи тотоу **2.** *в знач. вводн. сл.* билдәле, әлбиттә; **путеше́ственники, есте́ственно, интересова́лись хара́ктером зимы́** сәйәхәтселәр, әлбиттә, ҡыштың нисегерәк булыуы менән ҡыҙыҡһынды

**ЕСТЕ́СТВЕННОСТЬ** *ж* тәбиғилек; **есте́ственность ре́чи** телмәрҙең тәбиғилеге; **есте́ственность поведе́ния** үҙ-үҙеңде тотоуҙа тәбиғилек

**ЕСТЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәбиғи; **есте́ственные бога́тства Башкортоста́на** Башҡортостандың тәбиғи байлыҡтары; **есте́ственный цвет лица́** биттең тәбиғи төҫө; **есте́ственная смерть** үҙ үлеме; **есте́ственный отбо́р** тәбиғи һайланыш **2.** тәбиғәт ...ы; **есте́ственные нау́ки** тәбиғәт фәндәре

**ЕСТЕСТВО́** *с* **1.** *книж.* (*суть, сущность*) булмыш, асыл; **естество́ вопро́са** мәсьәләнең асылы **2.** *уст.* (*природа*) тәбиғәт

**ЕСТЕСТВОЗНА́НИЕ** *с* тәбиғәт белеме (фәне)

**ЕСТЕСТВОИСПЫТА́ТЕЛЬ** *м* тәбиғәт фәндәре белгесе

**ЕСТЬ I** *несов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* ашау; **хо́чется есть** ашағы килә; **есть ку́рицу** тауыҡ ите(н) ашау **2.** *что* (*разрушать, разъедать химически*) ашау, киҫеү, ҡырҡыу; **ржа́вчина ест желе́зо** тимерҙе тут ашай; **кислота́ ест тка́ни** кислота туҡымаларҙы ҡырҡа **3.** *что* (*о дыме*) әсеттереү; **дым ест глаза́** төтөн күҙҙе әсеттерә ♦ **есть чужо́й хлеб** кеше елкәһендә йәшәү; **есть глаза́ми** *кого* ашарҙай (йоторҙай) булып, текләп (тишеп) ҡарау; **есть по́едом** тереләй ашарҙай булыу; **есть про́сит** *шутл.* ашарға һорай (*башы тишелгән аяҡ кейеменә ҡарата*)

**ЕСТЬ II** **1.** *наст. вр. от* **быть** **2.** *в знач. сказ.* (*имеется*) бар; **у них есть что показа́ть** уларҙың күрһәтер нәмәләре бар; **есть ли у тебя́ роди́тели?** һинең ата-әсәң бармы? ♦ **как есть** шул көйө,

һис үҙгәрешһеҙ; **како́й ни (на) есть** ниндәй генә булһа ла, төрлөсә; **так и есть** ысынлап та шулай; **то́ есть (т.е.)** йәғни

**ЕСТЬ III** *межд.*; *воен.* була ул!

**ЕФРЕ́ЙТОР** *м* ефрейтор

**ЕФРЕ́ЙТОРСКИЙ,** -ая, -ое ефрейтор ...ы; **ефре́йторское зва́ние** ефрейтор дәрәжәһе

**Е́ХАТЬ** *несов.* **1.** барыу; **е́хать верхо́м** һыбай барыу; **е́хать на тролле́йбусе** троллейбуска ултырып барыу; **е́хать на саня́х** санала барыу **2.** (*уезжать*) китеү; **за́втра я е́ду в го́род** иртәгә ҡалаға китәм; **мы е́дем в экспеди́цию** беҙ экспедицияға китәбеҙ **3.** *перен.*, *разг.* шыуыу, тайыу; **на льду но́ги е́дут в ра́зные сто́роны** боҙҙа аяҡ тая ♦ **да́льше е́хать не́куда** башҡаса булдырып булмай, башҡаса сара юҡ, эш-хәлдең, нәмәнең бынан да насар булыуы мөмкин түгел

**ЕХИ́ДНА** *ж* **1.** *зоол.* ехидна (*терпе кеүек хайуан, ағыулы йылан*) **2.** *перен.*, *разг.* (*о злом, коварном человеке*) ҡара йылан

**ЕХИ́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* аҫтыртын көлөү, сәнскеле һүҙҙәр әйтеү, мыҫҡыллау

**ЕХИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҫтыртын уҫал; **ехи́дный челове́к** аҫтыртын уҫал кеше **2.** әсе, эскерле зәһәр, мыҫҡыллы; **ехи́дный смех** әсе көлөү; **ехи́дный взгляд** мыҫҡыллы ҡараш

**ЕХИ́ДСТВО** *с* аҫтыртын уҫаллыҡ, эскерлелек

**ЕХИ́ДСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **ехи́дничать**

**ЕЩЁ** *нареч.* **1.** (*вдобавок*) тағы, тағы ла, йәнә; **сходи́ ещё раз** тағы ла барып кил; **спой ещё э́ту пе́сню** йырла әле тағы был йырҙы **2.** (*до сих пор*) әле; **он ещё не пришёл домо́й** ул әле өйгә ҡайтмаған; **он ещё не ко́нчил рабо́ту** ул әле эшен тамамламаған **3.** (*уже*) инде, уҡ, үк; **он уе́хал ещё неде́лю тому́ наза́д** ул бынан бер аҙна элек үк китте инде **4.** (*при сравн. ст. прил.* и *нареч.*) тағы, тағы ла; **он стал ещё сильне́е** ул тағы ла көслөрәк булып китте **5.** *в знач. усил. частицы* әле, тағы; **как ещё полу́чится!** нисек килеп сығыр әле! ♦ **а ещё** етмәһә; **всё ещё** әле хәҙер ҙә, һаман, әлегә тиклем, хәҙергә тиклем; **ещё бы** әлбиттә, билдәле; **ещё ничего́** ярай әле, ярарлыҡ әле; **ещё и ещё** тағы ла күберәк

# Ж

**Ж** *см.* **же** I и **же** II

**ЖА́БА I** *ж* әрмәнде

**ЖА́БА II: грудна́я жа́ба** *уст.* йөрәк тотоу (*тын ҡыҫылып, йөрәк ауыртыуы*)

**ЖА́БЕРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** айғолаҡ ...ы; **жа́берные ду́ги** айғолаҡ дуғалары **2.** айғолаҡлы; **жа́берные живо́тные** айғолаҡлы хайуандар

**ЖА́БИЙ,** -ья, -ье әрмәнде ...ы; **жа́бья икра́** әрмәнде ыуылдырығы

**ЖА́БНИК** *м*; быума үләне

**ЖАБО́** *с нескл.* иҙеүсә (*селтәр йәки нәфис туҡыманан бөрмәләп, күпертеп тегелгән яға*)

**ЖА́БРЫ** *мн.* (*ед.* **жа́бра** *ж*) айғолаҡ (*ер-һыу хайуандарының тын алыу ағзаһы*) ♦ **брать (взять) за жа́бры** *прост.* боғаҙынан (яғаһынан) алыу

**ЖА́ВОРОНОК** *м* һабан турғайы; **жа́воронок хохла́тый** бүрекле (өлтөклө) һабан турғайы

**ЖА́ДИНА** *м* и *ж*; *разг.* ҡомһоҙ, ҡарун

**ЖА́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* һаранланыу, ҡарунланыу, ҡомһоҙланыу; **не жа́дничай, угоща́й** ҡомһоҙланма, һыйла

**ЖА́ДНО** *нареч.* **1.** ҡомһоҙланып, һаранланып; **жа́дно есть** ҡомһоҙланып ашау **2.** *перен.* йотлоғоп, бирелеп; **жа́дно слу́шать** йотлоғоп тыңлау

**ЖА́ДНОСТЬ** *ж* **1.** ҡомһоҙлоҡ, ҡомағайлыҡ, ҡомарлыҡ; **жа́дность к деньга́м** аҡсаға ҡомарлыҡ; **2.** һаранлыҡ, ҡарунлыҡ; **прояви́ть жа́дность** һаранлыҡ күрһәтеү

**ЖА́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡомһоҙ, ҡомар, һаран, ҡарун; **жа́дный челове́к** һаран кеше; **быть жа́дным к деньга́м** аҡсаға һаран булыу; **жа́дный на еду́** ашауға ҡомһоҙ **2.** *перен.* ашҡынып тороусы, атлыҡҡан, әүәҫ, үтә, ныҡ; **жа́дное любопы́тство** үтә ҡыҙыҡһыныу; **с жа́дным внима́нием** ныҡ иғтибар менән; **жа́дный на рабо́ту** эшкә атлығып тороусы

**ЖА́ЖДА** *ж* **1.** һыуһын, һыуһау, сарсау, эске килеү; **си́льная жа́жда** ныҡ һыуһау; **утоли́ть жа́жду** һыуһын ҡандырыу **2.** *перен.* көслө теләк, ынтылыш, һыуһау; **жа́жда зна́ний** белемгә булған көслө теләк, һыуһау; **жа́жда свобо́ды** ирекккә ынтылыш

**ЖА́ЖДАТЬ** *несов.* **1.** *книжн.*, *уст.* һыуһау, эске килеү **2.** *чего* и *с неопр.*; *перен.*, *книжн.* ныҡ теләү, атлығып тороу, ашҡыныу; **наро́ды жа́ждут ми́ра** халыҡтар тыныслыҡ теләй

**ЖАКА́Н** *м* жакан (*эре йәнлеккә ата торған ҡурғаш йәҙрә*; *айыу йәҙрәһе*)

**ЖАКЕ́Т** *м* жакет (*ҡатын-ҡыҙ кейеме*)

**ЖАЛЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* аяу, йәлләү, ҡыҙғаныу; **жале́ть ребёнка** баланы йәлләү **2.** *о ком-чём* и *с союзом "что"* (*сожалеть*) үкенеү, ҡайғырыу; **жале́ть о проше́дшем** үткәндәргә үкенеү **3.** *кого-что, чего* йәлләү, ҡыҙғаныу; **жале́ть де́нег** аҡса ҡыҙғаныу ♦ **не жале́я сил (рабо́тать, труди́ться)** көс аямай эшләү

**ЖА́ЛИТЬ** *несов. кого-что* сағыу; **пчёлы жа́лят** бал ҡорттары саға

**ЖА́ЛКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*достойный сострадания*) аянысл, ҡыҙғаныс, йәл, меҫкен; **жа́лкая**

**судьба́** аяныслы яҙмыш; **находи́ться в жа́лком состоя́нии** ҡыҙғаныс хәлдә булыу; **по ви́ду жа́лкий челове́к** ҡиәфәте менән меҫкен кеше **2.** (*неказистый*) таушалған, туҙған, эшлектән сыҡҡан; **кни́га име́ет жа́лкий вид** китап ныҡ таушалған **3.** (*мелкий, презренный*) ҡыҙғаныс, меҫкен, бахыр, байғош; **игра́ть жа́лкую роль** ҡыҙғаныс роль уйнау

**ЖА́ЛКО 1.** *нареч.* ҡыҙғаныс, ҡыҙғаныслы итеп; **на него́ жа́лко бы́ло смотре́ть** уға ҡарауы ҡыҙғаныс ине; **жа́лко улыба́ться** ҡыҙғаныслы итеп йылмайыу **2.** *в знач. сказ., безл.* ҡыҙғаныс, йәл; **мне тебя́ жа́лко** һин йәлһең миңә **3.** *чего* и *с неопр. в знач. сказ., безл.* йәл, әрәм, үкенесле; **де́нег жа́лко** аҡса йәл; **вре́мени жа́лко** ваҡыт әрәм **4.** *в знач. вводн. сл. см.* **жаль** 4

**ЖА́ЛО** *с* **1.** (*у насекомых*) ҡаяу, морон, томшоҡ; (*у змеи*) тел; **жа́ло пчелы́** бал ҡортоноң ҡаяуы; **жа́ло комара́** серәкәй томшоғо **2.** (*остриё, орудие*) йөҙ, беҙ; **жа́ло косы́** салғы йөҙө **3.** *перен.* уҡ, ҡаяу, үткер ос; **жа́ло сати́ры** сатира уғы

**ЖА́ЛОБА** *ж* **1.** (*сетование*) зар, зарланыу; **жа́лобы на тяжёлую жизнь** тормоштоң ауырлығына зарланыу **2.** (*заявление*) ялыу, шикәйәт; **пода́ть жа́лобу** ялыу биреү; **рассмотре́ть жа́лобу** ялыу тикшереү

**ЖА́ЛОБНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙғаныс, йөрәк әрнеткес, зарлы; **жа́лобный го́лос** ҡыҙғаныс тауыш; **жа́лобный стон** йөрәк әрнеткес ыңғырашыу; **жа́лобная пе́сня** зарлы йыр ♦ **жа́лобная кни́га** ялыу кенәгәһе

**ЖА́ЛОБЩИК** *м* и **ЖА́ЛОБЩИЦА** *ж* ялыусы, шикәйәт яҙыусы

**ЖА́ЛОВАННЫЙ,** -ая, -ое *ист.* бүләк итеп бирелгән (алынған) (*хөкүмәт йәки берәй кеше тарафынан*) ♦ **жа́лованная гра́мота** *ист.* (жалованный) хоҡуҡ грамотаһы (*ниндәйҙер өҫтөнлөк менән файҙаланырға хоҡуҡ биргән документ*)

**ЖА́ЛОВАНЬЕ** *с*; *уст.* эш (хеҙмәт) хаҡы; **двойно́е жа́лованье** ике эш хаҡы

**ЖА́ЛОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, чем, кому-чему, что*; *уст.* (*награждать*) бүләкләү, бүләк итеп биреү, наградлау **2.** *кого-что*; *разг.* яратыу, хөрмәт итеү, ҡәҙерләү; **его́ там не о́чень жа́луют** уны унда бик яратып бармайҙар **3.** *уст.* (*посещать*) килеү, күренеү; **вы давно́ к нам не жа́ловали** һеҙ беҙгә күптән килгәнегеҙ юҡ

**ЖА́ЛОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *на кого-что* зарланыу; **жа́ловаться на головну́ю боль** баш ауыртыуға зарланыу; **жа́ловаться на судьбу́** яҙмышҡа зарланыу **2.** *на кого-что* (*подавать жалобу*) ялыу биреү, шикәйәт яҙыу **3.** *на кого-что* и *без доп.*; *разг.* ошаҡлау

**ЖАЛОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое *зоол.* ҡаяулы, саға торған; **жалоно́сные насеко́мые** саға торған бөжәктәр

**ЖА́ЛОСТЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡыҙғаныусан, йәлләүсән, аяусан, бауырмал; **она́ жа́лостлива, всех жале́ет** ул бауырмал кеше, барыһын да йәлләй

**ЖА́ЛОСТЬ** *ж* ҡыҙғаныу, йәлләү, аяу; **вызыва́ть чу́вство жа́лости** йәлләү тойғоһо уятыу; йәлләтеү; **прояви́ть жа́лость** йәлләү ♦ **кака́я жа́лость!** ниндәй ҡыҙғаныс!, бик йәл!

**ЖАЛЬ 1.** *кого-что в знач. сказ., безл.* йәл, ҡыҙғаныс; **мне жаль его́** ул миңә йәл **2.** *кого-что, кого-чего в знач. сказ., безл.* (*о чувстве грусти, горечи*) ҡыҙғаныс, үкенескә ҡаршы, күңелһеҙ; **жаль, что вы уезжа́ете** китәһегеҙ икән, ҡыҙғаныс; **жаль, пого́да испо́ртилась** үкенескә ҡаршы, көн боҙолдо **3.** *чего* и *с неопр. в знач. сказ., безл.* йәл, әрәм; **жаль вре́мени** ваҡыт әрәм, ваҡыт йәл **4.** *в знач. вводн. сл.* (*к сожалению*) ҡыҙғанысҡа (үкенескә) ҡаршы

**ЖАЛЮЗИ́** *с нескл.* жалюзи (*ҡамыш йәки сыра пластинкаларҙан теҙеп яһалған тәҙрә ҡорғаны*)

**ЖАНДА́РМ** *м* жандарм

**ЖАНДАРМЕ́РИЯ** *ж* жандармерия (*полиция ғәскәре*)

**ЖАНР** *м* жанр (**1.** *әҙ. әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәре төрө* **2.** *сәнғ. тормош-көнкүреште кәүҙәләндергән һүрәт* **3.** *стиль, манера*)

**ЖА́НРОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** жанр ...ы; **жа́нровая осо́бенность** жанр үҙенсәлеге **2.** (*бытовой*) көнкүрешкә (тормошҡа) бәйле; **жа́нровая жи́вопись** тормошҡа бәйле һынлы сәнғәт

**ЖАР** *м* **1.** эҫе, ҡыҙыу; **жар пе́чи** мейес ҡыҙыуы; **жар ба́ни** мунса эҫеһе; **обдаёт жа́ром** эҫе бөркөлә **2.** ҡыҙыу, эҫе урын; **быть на жару́** эҫе урында тороу **3.** *разг.* ҡуҙ, утлы күмер; **вы́грести жар из пе́чи** мейестән ҡуҙ тартыу **4.** (*повышенная температура тела*) тән яныу, янып барыу; **у него́ жар** уның тәне янып бара **5.** *перен.* ашҡыныу, дәрт; **рабо́тать с жа́ром** дәрт менән эшләү ♦ **броса́ть то в жар, то в хо́лод** тән эҫеләһыуыҡлы булып китеү; **чужи́ми рука́ми жар загреба́ть** кеше көсөн (хеҙмәтен) файҙаланыу

**ЖАРА́** *ж* томра, ҡыҙыулыҡ, эҫелек, эҫе; **си́льная жара́** үтә эҫелек; **дневна́я жара́ спа́ла** көн ҡыҙыулығы һүрелде

**ЖАРГО́Н** *м* жаргон (*билдәле бер социаль төркөмдөң дөйөм халыҡ теленән айырмалы һүҙҙәре, әйтемдәре булған һөйләш*); **профессиона́льный жарго́н** профессиональ жаргон; **воровско́й жарго́н** ҡараҡтар жаргоны

**ЖАРГО́ННЫЙ,** -ая, -ое жаргон; **жарго́нное сло́во** жаргон һүҙ

**ЖА́РЕНЫЙ,** -ая, -ое ҡурылған, ҡыҙҙырылған; **жа́реная карто́шка** ҡыҙҙырылған картуф; **жа́реное мя́со** ҡурылған ит

**ЖА́РИТЬ** *несов.* **1.** *что* ҡурыу, ҡыҙҙырыу; **жа́рить грибы́ на ма́сле** бәшмәкте майҙа ҡурыу; **жа́рить се́мечки** көнбағыш ҡыҙҙырыу (ҡурыу) **2.** *кого-что* и *без доп.*; *разг.* (*о солнце*) ҡыҙҙырыу, яндырыу

**ЖА́РИТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡурылыу, ҡыҙҙырылыу; **ры́ба жа́рится** балыҡ ҡурыла **2.** *разг.* ҡыҙыныу; **жа́риться на со́лнце** ҡояшта ҡыҙыныу

**ЖА́РКИЙ,** -ая, -ое **1.** эҫе, ҡыҙыу; **жа́ркий день** эҫе көн; **жа́ркая ба́ня** ҡыҙыу мунса **2.** *перен.* ҡыҙыу, ҡайнар; **жа́ркий спор** ҡыҙыу бәхәс; **жа́ркий поцелу́й** ҡайнар үбеү **3.** *перен.* ҡаты, көслө; **жа́ркий бой** ҡаты һуғыш

**ЖА́РКО 1.** *нареч.* эҫе, ҡыҙыу итеп, ҡайнар; **жа́рко натопи́ть печь** мейесте ҡыҙыу итеп яғыу **2.** *нареч.*; *перен.* ҡыҙып, ҡыҙып китеп, ҡаты; **жа́рко спо́рить** ҡыҙып китеп бәхәсләшеү **3.** *в знач. сказ., безл.* эҫе, ҡыҙыу; **сего́дня о́чень жа́рко** бөгөн бик эҫе; **мне жа́рко** миңә эҫе

**ЖАРКО́Е** *с* ҡурҙаҡ, ҡурылған ит

**ЖАРО́ВНЯ** *ж* ҡуҙ мейесе, мангал

**ЖАРОВЫНО́СЛИВЫЙ,** -ая, -ое эҫегә сыҙамлы, ҡыҙыуға бирешмәгән; **жаровыно́сливые расте́ния** эҫегә сыҙамлы үҫемлектәр

**ЖАРОПОНИЖА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** температураны төшөрә торған **2.** *в знач. сущ.* **жаропонижа́ющее** *с* температураны төшөрә торған дарыу

**ЖАРОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое *тех.* утҡа сыҙамлы; **жаросто́йкий мета́лл** утҡа сыҙамлы металл

**ЖАРОТРУ́БНЫЙ: жаротру́бный котёл** *тех.* торбалы пар ҡаҙаны (*эсендәге торбалар буйынса ҡыҙыу газ үтеп йылына торған пар ҡаҙаны*)

**ЖАРОУПО́РНЫЙ,** -ая, -ое *тех. см.* **жаросто́йкий**

**ЖАР-ПТИ́ЦА** *ж*; *фольк.* ут-ҡош (*бәхет ҡошо*)

**ЖАСМИ́Н** *м* йәсмин; **цвето́к жасми́на** йәсмин сәскәһе

**ЖАСМИ́ННЫЙ** и **ЖАСМИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое йәсмин …ы; **жасми́нное ма́сло** йәсмин майы

**ЖА́ТВА** *ж* **1.** (*уборка хлебов*) ураҡ, ураҡ урыу, ашлыҡ урыу; **начала́сь жа́тва пшени́цы** бойҙай урағы башланды **2.** (*время уборки*) ураҡ өҫтө, ураҡ; **наступи́ла жа́тва** ураҡ етте **3.** (*урожай*) уңыш; **бога́тая жа́тва** бай уңыш

**ЖА́ТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ураҡ …ы, урыу …ы; **жа́твенный сезо́н** ураҡ ваҡыты, ураҡ өҫтө **2.** (*служащий для жатвы*) урғыс; **жа́твенная маши́на** урғыс машина

**ЖА́ТКА** *ж*; *с.-х.* урғыс, иген урғыс

**ЖАТЬ I** *несов.* **1.** һуғыу, ҡыҫыу; **жать виногра́д** йөҙөм һығыу; **жать ру́ку** ҡулды ҡыҫыу **2.** *что* и *без доп.* (*быть тесным*) ҡыҫыу; **сапоги́ жмут в подъёме** итектең алҡымы ҡыҫа **3.** *перен., разг.* (*притеснять*) ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау; **жмут их хозя́ева** уларҙы хужалары ҡыҫырыҡлайҙар

**ЖАТЬ II** *несов.* урыу; **жать хлеб** ашлыҡ урыу

**ЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*съёживаться*) бөршәйеү, көжрәйеү, ҡорошоу; **жа́ться от хо́лода** һыуыҡтан көжрәйеү **2.** (*прижиматься*) һырығыу, һырлығыу, һыйыныу; **соба́ка жа́лась к нога́м** эт аяҡҡа һырыҡты **3.** *разг.* (*колебаться*) икеләнеү, аптырау, аптырабыраҡ тороу **4.** *разг.* (*скупиться*) һаранланыу, һыҡмырланыу

**ЖБАН** *м* яндау

**ЖВА́ЧКА** *ж* **1.** (*у животных*) көйөш, көйшәм; **коро́ва пережёвывает жва́чку** һыйыр көйөшөн көйшәй **2.** *прост.* һағыҙ ♦ **жева́ть жва́чку** бер балыҡ башын сәйнәү, бер үк нәмәне тылҡыу

**ЖВА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көйөшлө, көйшәүсе, көйшәмле; **жва́чные живо́тные** көйөшлө мал **2.** *в знач. сущ.* **жва́чные** *мн.*; *зоол.* көйшәүселәр; **коро́ва отно́сится к жва́чным** һыйыр көйшәүселәргә ҡарай

**ЖГУТ** *м* жгут, бау; **соло́менный жгут** һаламдан ишелгән бау; **жгут для снопа́** көлтә бауы; **накла́дывать жгут** жгут һалыу

**ЖГУ́ТИК** *м* **1.** *уменьш. от* **жгут 2.** *зоол.* еп, күҙәнәк (*иң ябай төҙөлөшлө бер күҙәнәкләләрҙең хәрәкәт итеү ағзаһы*)

**ЖГУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*горячий*) эҫе, ҡыҙыу, көйҙөргөс; **жгу́чее со́лнце** ҡыҙыу ҡояш **2.** (*причиняющий боль*) бик ҡаты, әрнеткес, үтеп барған; **жгу́чий хо́лод** бик ҡаты һыуыҡ **3.** (*мучительный*) асы, ныҡ, ҡаты, тәрән; **жгу́чая тоска́ меня́ гло́жет** асы һағыш йөрәгемде телә; **жгу́чий стыд** ныҡ оялыу; **жгу́чие го́рести** ҡаты хәсрәт ♦ **жгу́чий брюне́т** сөм ҡара сәсле кеше; **жгу́чий вопро́с** бик мөһим мәсьәлә

**ЖДАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, кого-чего* көтөү, көтөп тороу; **ждать по́езд** поезд көтөп тороу; **ждать пи́сем** хат көтөү; **ждать к у́жину** киске ашҡа көтөү **2.** *чего* (*надеяться*) өмөтләнеү, өмөт итеү, көтөү; **ждать награ́ды** бүләк көтөү ♦ **вре́мя не ждёт** ваҡыт тар; **ждать не дожда́ться** түҙемһеҙләнеп көтөү, көтә-көтә көтөк булыу; **не ждать, не гада́ть** көтмәгәндә, уйламағанда; **того́ и жди** көт тә тор (*берәй насарлыҡ, хәүеф булғанда әйтелә*)

**ЖЕ I** и **Ж** *союз* **1.** *противит.* ә, иһә; **дом изнутри́ был оштукату́рен, снару́жи же обши́т доско́й** өй эстән һыланған, тыштан иһә таҡта менән көпләнгән ине **2.** *присоед.* ә, бит; **он не учёл обстано́вку того́ вре́мени, обстано́вка же была́ трево́жная** шул мәлдәге донъя хәлдәрен ул иҫәпкә алманы, ә хәл бик хәүефле ине

**ЖЕ II** и **Ж** *частица* **1.** (*для усиления значения слова*) инде, -сы/-се, уҡ, үк, һуң, бит; **на пе́рвом же шагу́** беренсе аҙымда уҡ; **когда́ же прие́дете?** ҡасан киләһегеҙ һуң?; **ся́дем же!** ултырайыҡ инде!, ултырайыҡсы!; **ушёл же** киткән бит **2.** *после нареч.* и *мест.* (*подчёркивает сходство или постоянство чего-л.*) уҡ, үк; **тот же** шулар уҡ; **сто́лько же** шунса уҡ; **тогда́ же** шул мәлдә үк

**ЖЁВАНЫЙ,** -ая, -ое сәйнәлгән, сәйнәп иҙелгән

**ЖЕВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сәйнәү ...ы, көйшәү ...ы, сәйнәй торған; **жева́тельные мы́шцы** сәйнәү мускулдары; **жева́тельная рези́нка** сәйнәй торған резинка ♦ **жева́тельный таба́к** тел аҫтына һала торған тәмәке

**ЖЕВА́ТЬ** *несов. что* ашау, сәйнәү; (*о жвачных*) көйшәү; **ме́дленно жева́ть** әкрен генә сәйнәү; **ло́шадь жева́ла се́но** ат бесән ашай ине ♦ **жева́ть губа́ми** тамшанып, ирендәрҙе ҡыймылдатыу

**ЖЕЗЛ** *м* жезл (**1.** *түрәлек һәм дәрәжә билдәһе булған махсус таяҡ* **2.** *транспорт хәрәкәтен көйләүсе милиционер таяғы* **3.** *тимер юлда поездар йөрөшөн тәртипкә һалыуҙа ҡулланылған металл таяҡ*)

**ЖЕЛА́НИЕ** *с* **1.** теләк, нәфсе, зауыҡ; **стра́стное жела́ние** нәфсе; **с жела́нием** теләк менән; **загоре́ться жела́нием** теләк уяныу, зауыҡ итеү; **горе́ть жела́нием** теләк менән яныу **2.** (*просьба, пожелание*) һорау, теләк; **испо́лнить жела́ние** һорауын (теләген) үтәү; **по жела́нию наро́да** халыҡтың теләге буйынса

**ЖЕЛА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*ожидаемый*) теләп, көтөп алынған, теләгән, көткән; **жела́нная весть** теләп (көтөп) алынған хәбәр **2.** (*дорогой, милый*) һөйөклө, ҡәҙерле; **жела́нный друг** ҡәҙерле дуҫ

**ЖЕЛА́ТЕЛЬНО** *в знач. сказ., безл., с неопр.* или *с союзом "чтобы"* кәрәк булыр, яҡшы булыр; **жела́тельно, что́бы рабо́ту зако́нчили в срок** эште ваҡытында тамамлау кәрәк булыр

**ЖЕЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көтөлгән, теләгән, кәрәкле; **жела́тельный результа́т** көтөлгән һөҙөмтә

**ЖЕЛАТИ́Н** *м* желатин (*кулинария, техника, медицинала һәм фото эшендә ҡулланылған аҡһым матдә*)

**ЖЕЛАТИ́НОВЫЙ** и **ЖЕЛАТИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** желатин ...ы; **желати́новое произво́дство** желатин етештереү **2.** желатин ...ы, желатинлы; **лека́рство с желати́новой оболо́чкой** желатинлы тышлы дарыу

**ЖЕЛА́ТЬ** *несов. кого-что, чего, с неопр.* или *с союзом "чтобы"* теләү, -ғы/-ге килеү, -рға/-ргә ине; **жела́ть познако́миться** танышырға теләү; **жела́ть добра́** яҡшылыҡ теләү; **жела́ть уви́деть** күрге килеү ♦ **оставля́ет жела́ть лу́чшего** бик шәптән түгел, ҡәнәғәтләнерлек түгел

**ЖЕЛА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **жела́ть** **2.** *в знач. сущ.* **жела́ющие** *мн.* теләүселәр, теләк белдереүселәр

**ЖЕЛВА́К** *м* төйөр, оро

**ЖЕЛЕ́** *с нескл.* **1.** желе (*емеш-еләк һутына, һөткә һ.б. желатин һалып әҙерләнгән, куйыраҡ татлы ашамлыҡ*); **моло́чное желе́** һөт желеһы **2.** (*заливное*) ҡойка ашы, тертелдәк

**ЖЕЛЕЗА́** *ж; анат.* биҙ; **щитови́дная железа́** ҡалҡан биҙе; **слю́нные же́лезы** шайыҡ биҙҙәре; **по́товые же́лезы** тир биҙҙәре

**ЖЕЛЕ́ЗИСТЫЙ I,** -ая, -ое тимерле; **желе́зистая руда́** тимерле мәғдән

**ЖЕЛЕ́ЗИСТЫЙ II,** -ая, -ое *анат.* биҙ ...ы; **желе́зистая кле́тка** биҙ күҙәнәге

**ЖЕЛЁЗКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **железа́** **2.** *бот.* биҙсә (*үҫемлектәрҙә ыҫмалалы йәки майлы матдә бүлеп сығарған күҙәнәктәр*)

**ЖЕЛЕ́ЗКО** *с; спец.* йышҡы бысағы

**ЖЕЛЕЗНОДОРО́ЖНИК** *м* и **ЖЕЛЕЗНОДОРО́ЖНИЦА** *ж* тимер юлсы

**ЖЕЛЕЗНОДОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тимер юл ...ы; **железнодоро́жный мост** тимер юл күпере

**ЖЕЛЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тимер...ы; **желе́зная руда́** тимер мәғдәне; **желе́зные опи́лки** тимер вағы **2.** тимер, ҡалай; **желе́зная лопа́та** тимер көрәк; **желе́зная кры́ша** ҡалай түбә **3.** *перен.* ныҡ, ҡаты; **желе́зный челове́к** ныҡ кеше; **желе́зная дисципли́на** ҡаты тәртип; **желе́зная во́ля** ҡаты ихтыяр **4.** *перен.* ҡоростай, ныҡ; **желе́зное здоро́вье** ҡоростай (һаулыҡ) таҙалыҡ ♦ **желе́зный век** *археол.* тимер быуаты (*тәүтормош кешеләре тимер ҡуллана башлаған осор*); **желе́зная доро́га** тимер юл

**ЖЕЛЕЗНЯ́К** *м* (*только с определением*) тимер мәғдәне; **кра́сный железня́к** ҡыҙыл тимер мәғдәне

**ЖЕЛЕ́ЗО** *с* **1.** тимер (*химик элемент, металл*) **2.** *собир.* тимер, тимер-томор, ҡалай; **листово́е желе́зо** ҡалай; **кро́вельное желе́зо** түбә ҡалайы

**ЖЕЛЕЗО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "тимер" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **железообраба́тывающий** тимер эшкәртеүсе

**ЖЕЛЕЗОБЕТО́Н** *м* тимер-бетон

**ЖЕЛЕЗОБЕТО́ННЫЙ,** -ая, -ое тимер-бетон; **железобето́нное сооруже́ние** тимер-бетон ҡоролма

**ЖЕЛЕЗОПРОКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое тимер (ҡалай) прокатлау ...ы; **железопрока́тный стан** ҡалай прокатлау станы

**ЖЕЛЕЗОРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое тимер мәғдәне ...ы; **железору́дная промы́шленность** тимер мәғдәне сәнәғәте

**ЖЕЛНА́** *ж* ҡара тумыртҡа

**ЖЁЛОБ** *м* һыулыҡ, улаҡ; **ста́вить жёлоб** һыулыҡ ҡуйыу; **водосто́чный жёлоб** һыу улағы; **ме́льничный жёлоб** тирмән улағы

**ЖЕЛО́НКА** *ж; тех.* желонка (*скважиналарҙы бырауլағанда һәм таҙартҡанда ҡулланылған ҡорал*)

**ЖЕЛТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*становиться жёлтым*) һарғайыу, һары төҫкә инеү; **ли́стья желте́ют** япраҡтар һарғая **2.** (*видеться — о жёлтом*)

һарғайып тороу, һары булып күренеү; **за огра́дой желте́ла шля́пка подсо́лнуха** ҡойма артынан көнбағыш һарғайып күренә ине

**ЖЕЛТЕ́ТЬСЯ** *несов. см.* **желте́ть** 2

**ЖЕЛТИЗНА́** *ж* һары (төҫ), һарылыҡ; **на лице́ появи́лась желтизна́** йөҙөнә һары сыҡҡан

**ЖЕЛТИ́ТЬ** *несов. что* һарғайтыу, һары төҫкә индереү, һары итеү

**ЖЕЛТО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һары" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **желтогру́дый** һары түш(ле); **желтокры́лый** һары ҡанатлы

**ЖЕЛТО́К** *м* йомортҡа һарыһы

**ЖЕЛТОКО́ЖИЙ,** -ая, -ее һары тәнле

**ЖЕЛТОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ее һары йөҙлө

**ЖЕЛТОПУ́ЗИК** *м* һары бауыр кеҫәртке, йылан кеҫәртке

**ЖЕЛТОРО́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о птенце*) һары суҡышлы; **желторо́тый галчо́нок** һары суҡышлы сәүкә балаһы **2.** *перен.*, *разг.* (*неопытный*) үтә йәш, тәжрибәһеҙ

**ЖЕЛТУ́ХА** *ж* һары ауырыуы, һары; **боле́ть желту́хой** һары менән ауырыу, һары булыу

**ЖЕЛТУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое һары, һары ауырыулы; **желту́шное лицо́** һарыһы йөҙөнә сыҡҡан

**ЖЁЛТЫЙ,** -ая, -ое һары; **жёлтая кра́ска** һары буяу; **жёлтый лист** һары япраҡ ♦ **жёлтая вода́** ҡараһыу (глаукома); **жёлтая лихора́дка** һары биҙгәк; **жёлтая ра́са** һары раса, һары тәнле кешеләр

**ЖЕЛУДЁВЫЙ,** -ая, -ое имән сәтләүеге ...ы; **желудёвый ко́фе** имән сәтләүеге ҡәһүәһе

**ЖЕЛУ́ДОК** *м* (*у человека и животных*) ашҡаҙан, ҡарын; (*у птиц*) бүтәгә, бөрләтәү; **на голо́дный желу́док** ас ҡарынға ♦ **расстро́йство желу́дка** эс китеү

**ЖЕЛУ́ДОЧЕК** *м* **1.** *уменьш. от* **желу́док 2.** (*часть сердца*) ҡарынсыҡ; **желу́дочек се́рдца** йөрәк ҡарынсығы **3.** (*полость в головном мозге*) ҡарынсыҡ; **желу́дочек головно́го мо́зга** баш мейеһенең ҡарынсығы

**ЖЕЛУ́ДОЧНО-КИШЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ашҡаҙан-эсәк ...ы; **желу́дочно-кише́чное заболева́ние** ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары; **желу́дочно-кишечный тракт** ашҡаҙан-эсәк юлы

**ЖЕЛУ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое ашҡаҙан ...ы; **желу́дочный сок** ашҡаҙан һуты

**ЖЁЛУДЬ** *м* имән сәтләүеге, туйыра

**ЖЁЛЧНЫЙ** и **ЖЕ́ЛЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үт ...ы; **же́лчный пузы́рь** үт ҡыуығы **2.** *перен.* (*злой, язвительный*) эсе телле, зәһәр; **жёлчный челове́к** эсе телле кеше

**ЖЁЛЧЬ** и **ЖЕЛЧЬ** *ж* **1.** үт, үт һыуы; **печёночная жёлчь** бауыр үте **2.** *перен.* (*раздражение*) асыу, зәһәр, ярһыу; **изли́ть свою́ жёлчь** зәһәрен сәсеү

**ЖЕМА́НИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* наҙланыу, ҡыланыу, борғоланыу, һырғаланыу

**ЖЕМА́ННИЦА** *ж*; *разг.* ҡылансыҡ, ҡыйшанлаҡ, наҙланып ҡыланған ҡатын-ҡыҙ

**ЖЕМА́ННИЧАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **жема́ниться**

**ЖЕМА́ННЫЙ,** -ая, -ое ҡылансыҡ, наҙланып ҡыланған, ҡыйшанлаҡ; **она́ проста́, в ней ничего́ жема́нного** ул ябай, ҡылансыҡ түгел

**ЖЕМА́НСТВО** *с* ҡылансыҡлыҡ, наҙланып ҡыланыу; **без вся́кого жема́нства** наҙланып ҡыланмай

**ЖЕ́МЧУГ** *м* ынйы; **пе́рстень с же́мчугом** ынйы ҡашлы йөҙөк

**ЖЕМЧУ́ЖИНА** *ж* **1.** ынйы бөртөгө **2.** *чего*; *перен.* ынйы, хазина, ҡиммәтле нәмә; **жемчу́жина наро́дного тво́рчества** халыҡ ижады ынйылары

**ЖЕМЧУ́ЖНИЦА** *ж* ынйы ҡабырсағы

**ЖЕМЧУ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ынйы ...ы; **жемчу́жное зерно́** ынйы бөртөгө **2.** *перен.* ынйы, ынйы кеүек, мәрүәт; **жемчу́жные зу́бы** ынйы кеүек тештәр

**ЖЕНА́** *ж* ҡатын, бисә; **жена́ солда́та** һалдат ҡатыны

**ЖЕНА́ТЫЙ,** -ая, -ое өйләнгән, йәмәғәтле; **жена́тый па́рень** өйләнгән егет; **жена́тый челове́к** йәмәғәтле кеше

**ЖЕНИ́ТЬ** *сов.*, *несов. кого* өйләндереү, йәмәғәтле (ҡатынлы) итеү

**ЖЕНИ́ТЬБА** *ж* өйләнеү, ҡатын (кәләш) алыу

**ЖЕНИ́ТЬСЯ** *сов., несов.* өйләнеү, ҡатын (кәләш) алыу, өйләнешеү, никахлашыу

**ЖЕНИ́Х** *м* кейәү, кейәү егет

**ЖЕНОЛЮ́Б** *м* ҡатын-ҡыҙ яратыусы, йөрөмтәл

**ЖЕНОНЕНАВИ́СТНИК** *м* ҡатын-ҡыҙҙы күрә алмаусы (яратмаусы), ҡатын-ҡыҙҙан ситләшергә тырышҡан кеше

**ЖЕНОПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое ҡатынша, ҡатын-ҡыҙға оҡшаған

**ЖЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡатын-ҡыҙ(ҙар) ...ы, ҡатын-ҡыҙға хас; **же́нская оде́жда** ҡатын-ҡыҙҙар кейеме; **Междунаро́дный же́нский день** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө; **же́нская не́жность** ҡатын-ҡыҙға хас нәфислек **2.** *бот.* инәлек ...ы; **же́нский цвето́к у расте́ний** үләндәрҙең инәлек сәскәһе ♦ **же́нские боле́зни** *мед.* ҡатын-ҡыҙ ауырыуы; **же́нский пол**: 1) ҡатын-ҡыҙҙар енесе; 2) *собир.*; *разг.* ҡатын-ҡыҙ

**ЖЕ́НСТВЕННОСТЬ** *ж* нәфислек, гүзәллек, күркәмлек, мөләйемлек

**ЖЕ́НСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡатын-ҡыҙға хас, ҡатын-ҡыҙ тәбиғәтле, мөләйем, нәфис; **же́нственная нату́ра** ҡатын-ҡыҙҙарға хас мөләйем тәбиғәт

**ЖЕ́НЩИНА** *ж* ҡатын, ҡатын-ҡыҙ; **пожила́я же́нщина** оло йәштәге ҡатын

**ЖЕНЬШЕ́НЕВЫЙ,** -ая, -ое женьшень ...ы; **женьше́невый крем** женьшень кремы

**ЖЕНЬШЕ́НЬ** *м* женьшень; **ко́рень женьше́ня** женьшень тамыры

**ЖЕРДИ́НА** *ж*; *разг. см.* **жердь**

**ЖЁРДОЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **жердь** **2.** (*насест*) төнәгес, ҡуналка

**ЖЕРДЬ** *ж* һайғау, кәртә, ҡолға, шыйҙа; **сруби́ть жердь** һайғау ҡырҡып алыу; **поста́вить огра́ду из жерде́й** һайғауҙар менән кәртәләү

**ЖЕРДЯНО́Й,** -ая, -ое кәртә, һайғау, кәртәнән (һайғауҙан) эшләнгән; **жердяны́е воро́та** кәртә ҡапҡа; **жердяно́й мо́стик** һайғауҙан эшләнгән күпер

**ЖЕРЁБАЯ** быуаҙ (*бейә, ишәк, дөйәгә ҡарата*)

**ЖЕРЕБЁНОК** *м* ҡолон; (*до трёх месяцев*) ҡолонсаҡ; (*до года*) ябаға; (*до двух лет*) тай; **жеребёнок-стригу́н** ҡырҡмыш, ҡырҡмыш тай

**ЖЕРЕБЕ́Ц** *м* айғыр; (*до трёх лет*) дүнән; (*до четырёх лет*) ҡонан; (*вожак табуна*) өйөр айғыры; (*не производитель*) һәүерек; **необъе́зженный жеребе́ц** аҫау айғыр; **племенно́й жеребе́ц** тоҡом айғыры

**ЖЕРЕБИ́ТЬСЯ** *несов.* (*о кобыле, ослице*) ҡолонлау; (*о верблюдице*) балалау

**ЖЕРЕБО́К** *м* етлекмәй тыуған ҡолон тиреһе

**ЖЕРЁБОСТЬ** *ж* быуаҙ булыу (*бейә, ишәк, дөйәгә ҡарата*)

**ЖЕРЕБЬЁВКА** *ж* йәрәбә, шыбаға; **провести́ жеребьёвку** шыбаға тотоу

**ЖЕРЕБЯ́ТИНА** *ж* йәш йылҡы (ҡолон, тай) ите

**ЖЕРЕБЯ́ЧИЙ,** -ья, -ье ҡолон (тай) ...ы; **жеребя́чье ржа́ние** ҡолон кешнәүе

**ЖЕ́РЕХ** *м* ағасаҡ, ағасъяңаҡ (*балыҡ*)

**ЖЕРЛИ́ЦА** и **ЖЕ́РЛИЦА** *ж* ҡарпыткыс (*ваҡ балыҡ ҡуйып, эре балыҡҡа һалған ҡармаҡ*)

**ЖЕРЛО́** *с*; *в разн. знач.* ауыҙ; **жерло́ пе́чи** мейес ауыҙы; **жерло́ коло́дца** ҡоҙоҡ ауыҙы; **жерло́ вулка́на** вулкан ауыҙы; **жерло́ пу́шки** пушка ауыҙы

**ЖЁРНОВ** *м* тирмән ташы

**ЖЕ́РТВА** *ж* **1.** *в разн. знач.* ҡорбан; **свяще́нная же́ртва** изге ҡорбан **2.** (*самопожертвование*) ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ, үҙен ҡорбан итеү; **он был гото́в на любы́е же́ртвы** ул теләһә ниндәй ауырлыҡтарға ла әҙер ине **3.** *уст.* (*пожертвование*) иғәнә, бүләк ♦ **пасть (стать, станови́ться) же́ртвой** ҡорбан булыу; **принести́ в же́ртву** ҡорбан итеү; **приноси́ть же́ртву** ҡорбан салыу

**ЖЕ́РТВЕННИК** *м* ҡорбан салыу урыны

**ЖЕ́РТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст. см.* **же́ртва** 1; **же́ртвенные обря́ды** ҡорбан салыу йолаһы **2.** (*самоотверженный*) үҙен аямаған, үҙен фиҙа ҡылған; **же́ртвенное отноше́ние к де́лу** эш тип үҙен фиҙа ҡылыу

**ЖЕ́РТВОВАТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* бүләк итеп биреү, иғәнә итеү **2.** *кем-чем*; *перен.* ҡорбан итеү, фиҙа ҡылыу; **же́ртвовать собо́й** үҙеңде ҡорбан итеү

**ЖЕРТВОПРИНОШЕ́НИЕ** *с* ҡорбан килтереү (биреү) (*йола*)

**ЖЕСТ** *м* **1.** ым, ишара, ҡул хәрәкәте; **же́стом приглаша́ть сади́ться** ым менән ултырырға саҡырыу **2.** *перен.* ҡылыҡ, ҡылынған эш (*ниндәйҙер уй менән*); **сде́лать краси́вый жест** матур ҡылыҡ ҡылыу

**ЖЕСТИКУЛИ́РОВАТЬ** *несов.* ҡул болғау, ҡул менән ишара (хәрәкәт) яһау

**ЖЕСТИКУЛЯ́ЦИЯ** *ж* ҡул болғау; **сопровожда́ть речь жестикуля́цией** ҡул болғап һөйләү

**ЖЁСТКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*твёрдый, крепкий*) ҡаты, шырт; **жёсткое мя́со** ҡаты ит; **жёсткая рука́** ҡаты ҡул; **жёсткие во́лосы** шырт сәс **2.** *перен.* (*суровый*) уҫал, тупаҫ, ҡаты; **жёсткая кри́тика** ҡаты тәнҡит; **жёсткий челове́к** ҡаты (тәбиғәтле) кеше; **жёсткий моро́з** ҡаты һыуыҡ **3.** *перен.* (*неуклонный, безоговорочный*) киҫкен, ҡырҡа, бик ҡаты; **жёсткие усло́вия** бик ҡаты шарттар ♦ **жёсткий ваго́н** *ж.-д.* ҡаты вагон; **жёсткая вода́** татырлы һыу

**ЖЕСТКО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡаты", "шырт" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **жестковоло́сый** шырт сәсле; **жестколи́ственный** ҡаты япраҡлы

**ЖЕСТКОКРЫ́ЛЫЕ** *мн.*; *зоол.* ҡаты ҡанатлылар (*ҡуңыҙ, ҡамҡа һ.б.*)

**ЖЕСТО́КИЙ,** -ая, -ое **1.** (*безжалостный*) аяуһыҙ, ҡанһыҙ, ҡаты күңелле, шәфҡәтһеҙ, миһырбанһыҙ; **жесто́кий челове́к** ҡаты күңелле кеше **2.** (*сильный*) ҡаты, көслө; **жесто́кое сопротивле́ние** ҡаты ҡаршылыҡ; **разгоре́лся жесто́кий спор** ҡаты бәхәс башланды **3.** ҡаты, сатлама; **жесто́кий моро́з** сатлама һыуыҡ

**ЖЕСТОКОСЕ́РДИЕ** *с* ҡаты күңеллелек, рәхимһеҙлек, таш йөрәклелек

**ЖЕСТОКОСЕ́РДНЫЙ,** -ая, -ое ҡаты күңелле (бәғерле), рәхимһеҙ, таш йөрәкле

**ЖЕСТО́КОСТЬ** *ж* **1.** аяуһыҙлыҡ, рәхимһеҙлек, ҡанһыҙлыҡ, ҡатылыҡ, мәрхәмәтһеҙлек; **прояви́ть жесто́кость** ҡанһыҙлыҡ күрһәтеү; **нет преде́ла его́ жесто́кости** уның ҡанһыҙлығының сиге юҡ **2.** *перен.* (*резкость*) ҡатылыҡ, киҫкенлек; **жесто́кость кли́мата** климаттың ҡатылығы

**ЖЕСТЬ** *ж* ҡалай; **бе́лая жесть** аҡ ҡалай

**ЖЕСТЯ́НКА** *ж* **1.** (*коробка*) ҡалай һауыт **2.** *разг.* (*кусок жести*) ҡалай киҫәге

**ЖЕСТЯНО́Й,** -ая, -ое ҡалай; **жестяно́й ча́йник** ҡалай сәйнүк; **жестяна́я кры́ша** ҡалай түбә

**ЖЕСТЯ́НЩИК** *м* ҡалайсы, ҡалай сигәләүсе

**ЖЕТО́Н** *м* жетон (**1.** *бүләк, приз рәүешендә бирелә торған йәки берәй ваҡиға иҫтәлегенә сығарылған металл значок* **2.** *шартлы билдәһе булған йәки нимәгәлер хоҡуҡ биргән ҡалай киҫәге*)

**ЖЕЧЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*уничтожать огнём*) яндырыу, үртәү; **жечь стерню́** ҡамыл янды-

рыу **2.** *что* (*заставлять гореть*) яғыу, яндырыу; **жечь дрова́** утын яғыу; **жечь ла́мпу** шәм яндырыу **3.** *кого-что* и *без доп.* (*обжигать*) ҡыҙҙырыу, көйҙөрөү, яндырыу; (*о морозе*) өтөү; (*о крапиве*) сағыу; (*о йоде*) яндырыу, әсеттереү; **со́лнце так и жжёт** ҡояш ҡыҙҙыра ғына; **внутри́ всё жжёт** эстән яндырып әрнетә; **боль жгла глаза́** күҙ әсеттереп ауырта; **ду́ет се́верный ве́тер, жжёт** төньяҡтан ел иҫә, өтөп бара; **йод жжёт** йод әсеттерә **4.** *кого-что* и *без доп.*; *перен.* өйкәү (күңелде), әрнетеү; **трево́жные мы́сли жгут се́рдце** борсоулы уйҙар йөрәкте өйкәй **5.** *что* (*обжигать для придания твёрдости*) үртәү, яндырыу; **жечь кирпичи́** кирбес үртәү

**ЖЖЕ́НИЕ** *с* яндырыу, әрнетеү, әсетеү, әсетеп һыҙлау; **жже́ние в груди́** күкрәкте эстән яндырыу

**ЖЖЁНКА** *ж* жжёнка (*көйҙөрөлгән шәкәргә төрлө тәм-том, емеш ҡушып, ром йәки коньяктан яһалған эсемлек*)

**ЖЖЁНЫЙ,** -ая, -ое (*обожжённый*) үртәлгән, көйҙөрөлгән, яндырылған

**ЖИВЕ́Ц** *м*; *рыб.* ем балыҡ (*ҡармаҡҡа ҡуйылған тере бәләкәй балыҡ*)

**ЖИВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көс (дәрт) бирә торған, хәл индерә торған; **живи́тельный го́рный во́здух** хәл индерә торған тау һауаһы

**ЖИВИ́ЦА** *ж* сайыр

**ЖИ́ВНОСТЬ** *ж собир.*; *разг.* ваҡ тереклек, ҡош-ҡорт

**ЖИ́ВО** *нареч.* **1.** асыҡ итеп, йәнле итеп; **обрисова́ть жи́во и правдоподо́бно** *что-л.* *нимәнелер* асыҡ итеп һәм ысынбарлыҡтағыса һөйләп биреү **2.** йәнле, күтәренке рухлы; **бесе́да вела́сь жи́во и бо́йко** әңгәмә бик йәнле һәм ҡыҙыу барҙы **3.** *разг.* тиҙ генә, бик тиҙ, шунда уҡ, йәһәт кенә; **жи́во оде́ться** тиҙ генә кейенеп алыу

**ЖИВО́Й,** -ая, -ое **1.** (*обладающий жизнью*) тере, иҫән; **жива́я ры́ба** тере балыҡ; **живо́е существо́** тере йән; **быть живы́м** тере (иҫән) булыу **2.** (*подвижный*) теремек, етеҙ, тилбер; **живо́й ребёнок** теремек бала **3.** (*оживлённый*) йәнле, шаулы; **проспе́кт стал са́мым живы́м ме́стом го́рода** проспект ҡаланың иң йәнле урынына әйләнде **4.** (*подлинный*) ысын, йәнле, ысынбарлыҡ, реаль; **жи́вой приме́р** ысын хәл **5.** (*яркий, выразительный*) тасуирлы, йәнле, еңел; **живо́е повествова́ние** тасуирлы һөйләү ♦ **жива́я вода́** *фольк.* тере һыу; **жива́я и́згородь** тәбиғи ҡойма (*үҫеп ултырған ағас йәки ҡыуаҡтан торған ҡойма*); **жива́я приро́да** йәнле тәбиғәт; **жива́я ра́на**: 1) (*рана, ещё не зажившая*) бөтәү яра; 2) *перен.* (*душевное страдание*) күңел яраһы; **жива́я си́ла** йәнле көс (*кешеләр, эш хайуандары*); **живо́го ме́ста не оста́вить** һау ерен ҡалдырмау (туҡмалыуҙан); **живо́й вес** тереләй ауырлыҡ; **живо́й разгово́рный язы́к** йәнле һөйләү теле; **живы́е цветы́** тере сәскәләр; **заде́ть за живо́е** ауыртҡан ергә тейеү; **жив-здоро́в**; **жив и здоро́в** иҫән-аман, иҫән-һау

**ЖИВОПИ́СЕЦ** *м* рәссам

**ЖИВОПИ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** рәсем яһау ...ы, һынлы сәнғәт ...ы; **живопи́сная мастерска́я** рәсем яһау оҫтаханаһы; **живопи́сный портре́т** һынлы сәнғәт портреты **2.** йәмле, матур, һүрәттәге кеүек; **живопи́сный вид** йәмле күренеш **3.** *перен.* асыҡ, сәнғәтле, образлы; **живопи́сное сравне́ние** асыҡ сағыштырыу

**ЖИ́ВОПИСЬ** *ж* **1.** рәсем сәнғәте, һынлы сәнғәт; **уро́ки жи́вописи** рәсем сәнғәте дәрестәре **2.** *собир.* рәсемдәр, картиналар

**ЖИВОРОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее *зоол.* тере бала тыуҙырыусы (*хайуандарға һәм ҡайһы бер балыҡтарға ҡарата*); **живородя́щая ры́ба** тере бала тыуҙырыусы балыҡ

**ЖИ́ВОСТЬ** *ж* **1.** етеҙлек, йылдамлыҡ; **ю́ношеская жи́вость** йәштәргә хас етеҙлек; **жи́вость движе́ний** хәрәкәттәге йылдамлыҡ **2.** сағыулыҡ, һиҙгерлек, зирәклек, үткерлек; **жи́вость ума́** аҡылдың зирәклеге

**ЖИВО́Т I** *м* ҡорһаҡ, эс, ҡарын; **большо́й живо́т** ҙур ҡорһаҡ; **бо́ли в животе́** эс ауыртыу; **взду́тие живота́** эс күбеү ♦ **надорва́ть живо́т со́ смеху** һын ҡатҡансы көлөү

**ЖИВО́Т II** *м*; *уст.* (*жизнь*) йән, тормош, йәшәү ♦ **не щадя́ живота́ своего́**; **не на живо́т, а на́ смерть** йәнен-тәнен аямай

**ЖИВОТВО́РНЫЙ,** -ая, -ое *высок.* йәнләндергес, дәртләндергес, рухландырғыс, йәшәү көсө биргән; **животво́рные лучи́ со́лнца** йәшәү көсө биргән ҡояш нурҙары; **животво́рная си́ла любви́** мөхәббәттең рухландырыу көсө

**ЖИВОТНОВО́Д** *м* малсы, мал ҡараусы

**ЖИВОТНОВО́ДСТВО** *с* малсылыҡ, мал аҫрау эше

**ЖИВОТНОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое малсылыҡ ...ы; **животново́дческая фе́рма** малсылыҡ фермаһы

**ЖИВО́ТНОЕ** *с* **1.** йән эйәһе, хайуан; **дома́шние живо́тные** йорт хайуандары; **хи́щные живо́тные** йыртҡыс хайуандар **2.** *разг.* (*о человеке*) хайуан

**ЖИВО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хайуан ...ы; **живо́тный мир** хайуандар донъяһы **2.** хайуандарса, хайуандарға хас; **живо́тный страх** хайуандарса ҡурҡыу **3.** *перен.* хайуани, тупаҫ; **живо́тная страсть** хайуани теләк

**ЖИВОТРЕПЕ́ЩУЩИЙ,** -ая, -ее иң мөһим, көн үҙәгендәге; **животрепе́щущий вопро́с** көн үҙәгендәге мәсьәлә

**ЖИВУ́ЧЕСТЬ** *ж* йәшәү көсө (теләге), сыҙамлылыҡ, йән түҙеме

**ЖИВУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** бирешмәүсән, йәшәүсән, эт йәнле, ныҡ, сыҙам; **ры́ба оказа́лась жи-**

**ву́чей** балыҡ бирешмәүсән булып сыҡты **2.** *перен.* оҙаҡҡа барған, оҙаҡ һаҡланған, оҙон ғүмерле; **наро́дные преда́ния живу́чи** халыҡ риүәйәттәре оҙон ғүмерле була

**ЖИ́ВЧИК** *м* **1.** *см.* **живе́ц 2.** *физиол.* аталыҡ, аталыҡ орлоғо **3.** *разг.* (*подвижный*) теремек (*кеше*) **4.** *разг.* (*биение артерии на виске, нервное подёргивание века*) сикә тамыры һуғыуы, күҙ ҡабағының тартыуы

**ЖИВЬЁМ** *нареч.*; *разг.* тереләй, тереләтә, тере көйө

**ЖИ́ДКИЙ,** -ая, -ое **1.** шыйыҡ; **жи́дкий суп** шыйыҡ аш; **опусти́лся жи́дкий тума́н** шыйыҡ ҡына томан төштө **2.** һирәк, йоҡа; **жи́дкий лес** һирәк урман; **жи́дкие во́лосы** йоҡа сәс; **в э́том году́ трава́ была́ жи́дкая** быйыл үлән йоҡа булды. **3.** *разг.* (*о голосе, звуках*) йомшаҡ, көсһөҙ, зәғиф; **жи́дкий голосо́к** зәғиф кенә тауыш **4.** *перен., разг.* (*несодержательный*) йомшаҡ; **жи́дкий расска́з** йомшаҡ хикәйә

**ЖИ́ДКОСТЬ** *ж* **1.** шыйыҡса; **сосу́д с жи́дкостью** шыйыҡса һалынған һауыт **2.** һирәклек, йоҡалыҡ, йомшаҡлыҡ; **жи́дкость воло́с** сәстең һирәклеге

**ЖИ́ЖА** *ж* батҡаҡ, һарҡынды; **наво́зная жи́жа** тиҙәк һарҡындыһы; **снег преврати́лся в гря́зную жи́жу** ҡар ireп батҡаҡҡа әйләнде

**ЖИЗНЕДЕ́ЯТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** *биол.* (*совокупность жизненных отправлений организма*) йәшәйеш, йәшәүгә һәләтлелек; **жизнеде́ятельность кле́тки** күҙәнәктең йәшәйеше **2.** (йәшәү) эшмәкәрлек, эшлеклелек (*кешегә, шәхескә ҡарата*); **челове́ческая жизнеде́ятельность** кешенең йәшәү эшмәкәрлеге

**ЖИЗНЕДЕ́ЯТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *биол.* йәшәүгә һәләтле **2.** эшмәкәр, эшлекле, булдыҡлы; **спосо́бный, жизнеде́ятельный коллекти́в** эшкә һәләтле, эшлекле коллектив

**ЖИЗНЕЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое тормошҡа ғашиҡ, тормош яратыусан; **жизнелюби́вый челове́к** тормошҡа ғашиҡ кеше

**ЖИ́ЗНЕННОСТЬ** *ж* **1.** йәшәү көсө, тереклек итеү һәләте; **жи́зненность кле́тки** күҙәнәктең йәшәү көсө **2.** тормошсанлыҡ; **игра́ актри́сы отлича́лась жи́зненностью** актрисаның уйыны тормошсанлығы менән айырылып торҙо

**ЖИ́ЗНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тормош ...ы, йәшәү ...ы, ғүмер ...ы; **жи́зненный о́пыт** тормош тәжрибәһе; **жи́зненная си́ла** йәшәү көсө **2.** (*реальный*) тормошсан, тормошҡа яҡын; **фильм был весёлый и дово́льно жи́зненный** фильм күңелле һәм шаҡтай тормошсан ине **3.** *перен.* (*важный для жизни*) мөһим, әһәмиәтле, бик кәрәкле; **жи́зненный вопро́с** мөһим мәсьәлә

**ЖИЗНЕОПИСА́НИЕ** *с* тәржемәи хәл, биография

**ЖИЗНЕРА́ДОСТНОСТЬ** *ж* шат күңел, күңел көрлөгө

**ЖИЗНЕРА́ДОСТНЫЙ,** -ая, -ое шат (көр) күңелле

**ЖИЗНЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* йәшәү көсө, йәшәүгә һәләтлелек (булдыҡлылыҡ); **при уме́лом хране́нии семена́ не теря́ют свою́ жизнеспосо́бность** дөрөҫ һаҡлағанда орлоҡтар үҙҙәренең йәшәү көсөн юғалтмай

**ЖИЗНЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое йәшәүгә һәләтле, йәшәү көсө ныҡлы булған; **жизнеспосо́бный органи́зм** йәшәүгә һәләтле организм

**ЖИЗНЕСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое тормош шарттарына бирешмәгән, сыҙамлы, ныҡ; **жизнесто́йкий сорт ржи** арыштың сыҙамлы сорты

**ЖИЗНЕСТО́ЙКОСТЬ** *ж* сыҙамлылыҡ, түҙемлелек, ныҡлыҡ

**ЖИЗНЕУТВЕРЖДА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее оптимизм менән һуғарылған, тормошсан; **жизнеутвержда́ющая иде́я** оптимизм менән һуғарылған идея

**ЖИЗНЬ** *ж* **1.** тормош, йәшәү, тереклек; **возникнове́ние жи́зни на Земле́** Ерҙә тормош(тоң) барлыҡҡа килеүе; **о́браз жи́зни** йәшәү рәүеше; **жизнь живо́тных** хайуандар тормошо **2.** ғүмер; **на всю жизнь** ғүмергә, ғүмер буйына; **на скло́не жи́зни** ғүмер ахырында; **продли́ть жизнь** ғүмер оҙайтыу **3.** (*физиологическое состояние*) йән; **не пока́зывать при́знаков жи́зни** йәне булмау **4.** (*деятельность*) тормош; **обще́ственная жизнь** ижтимағи тормош; **повседне́вная жизнь** көндәлек тормош; **семе́йная жизнь** ғаилә тормошо; **духо́вная жизнь** рухи тормош; **жизнь земна́я** ерҙәге тормош; **на у́лице кипе́ла жизнь** урамда тормош ҡайнап тора ♦ **войти́ в жизнь** тормошҡа аяҡ баҫыу; **вдохну́ть жизнь** йән өрөү; **дать жизнь** *кому* донъяға килтереү, тыуҙырыу; **жизнь моя́** (*обращение*) йәнем минең; **ни в жизнь** бер ҡасан да, ғүмерҙә лә; **отда́ть (положи́ть) жизнь** *за кого-что* йәнде фиҙа ҡылыу, ғүмереңде биреү

**ЖИ́ЛА** *ж* **1.** *разг.* ҡан тамыры (*сухожилие*) һеңер, тарамыш **2.** *геол.* юлаҡ, ҡатлам; **жи́ла ка́менного угля́** таш күмер юлағы **3.** *тех.* тын, ҡат (*кабель сымдарының береһе*) ♦ **тяну́ть (вытя́гивать) жи́лы** *из кого* елеген һурыу

**ЖИЛЕ́Т** *м* жилет

**ЖИЛЕ́Ц** *м* и **ЖИЛИ́ЦА** *ж* кешелә (фатирҙа) тороусы ♦ **не жиле́ц (на бе́лом све́те)** гүр һыуығы ингән (*үлер тигән мәғәнәлә*)

**ЖИ́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** һеңерле, ярылы; **жи́листое мя́со** һеңерле ит **2.** тамырҙары ҡалҡып (беленеп) торған, тамырлы; **жи́листые ру́ки** тамырҙары беленеп торған ҡул



11 зак. 2.0084.05

**ЖИЛИ́ЩЕ** *с* торлаҡ; **стро́ить жили́ще** торлаҡ төҙөү

**ЖИЛИ́ЩНЫЙ,** -ая, -ое торлаҡ ...ы; **жили́щные усло́вия** торлаҡ шарттары

**ЖИ́ЛКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **жи́ла** 1; **2.** *бот., зоол.* тамыр, тамырсыҡ (*япраҡтарҙа һәм бөжәк ҡанаттарында*) **3.** (*прослойка в горных породах*) юлаҡ; **мра́мор с кра́сными жи́лками** ҡыҙыл юлаҡлы мәрмәр **4.** *перен.* һәләт, әүәҫлек; **литерату́рная жи́лка** әҙәби ижадҡа һәләт

**ЖИЛО́Й,** -ая, -ое **1.** торлаҡ; **строи́тельство жилы́х зда́ний** торлаҡ йорттар һалыу **2.** кеше торған (йәшәгән); **жила́я полови́на до́ма** өйҙөң кеше торған яғы

**ЖИЛПЛО́ЩАДЬ** *ж* (*жилая площадь*) торлаҡ майҙаны

**ЖИЛЬЁ** *с* **1.** кеше йәшәгән (торған) урын; **далеко́ от челове́ческого жилья́** кеше йәшәгән урындан алыҫ **2.** *разг.* (*жилище*) торлаҡ, йәшәү (тороу) урыны; **вре́менное жильё** ваҡытлыса йәшәү урыны; **найти́ кварти́ру для жилья́** торорға урын табыу

**ЖИМ** *м*; *спорт.* штанга күтәреү; **жим двумя́ рука́ми** штанганы ике ҡул менән күтәреү

**ЖИ́МОЛОСТЬ** *ж* айыу балаһы

**ЖИР** *м* май; **живо́тный жир** туң май; **нутряно́й жир** эс майы; **ры́бий жир** балыҡ майы ♦ **заплы́ть жи́ром** май бөрөү; **с жи́ру беси́ться** майына сыҙамау, туйып һикереү

**ЖИРА́Ф** *м* и **ЖИРА́ФА** *ж* жираф

**ЖИРЕ́ТЬ** *несов.* һимереү, көрәйеү

**ЖИ́РНОСТЬ** *ж* **1.** (*степень содержания жира в чём-л.*) ҡуйылыҡ; **жи́рность молока́** һөттөң ҡуйылығы **2.** (*упитанность*) һимеҙлек, көрлөк

**ЖИ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*содержащий много жира*) майлы, майланған; (*о мясе*) һимеҙ; (*о супе*) майлы, өрөлө; (*о молоке*) ҡуйы, ҡаймаҡлы; **жи́рная пи́ща** майлы аш; **жи́рное пятно́** майлы тап **2.** һимеҙ, көр, һимергән; **жи́рный кот** һимеҙ бесәй **3.** (*о почве*) һутлы; (*о глине*) үҙле **4.** (*о линии*) ҡалын, йыуан; **жи́рная черта́** ҡалын һыҙыҡ ♦ **жи́рный кусо́к** һимеҙ ҡалъя

**ЖИРОВА́ТЬ I** *несов. что*; *тех.* май һеңдереү, майлау

**ЖИРОВА́ТЬ II** *несов.* **1.** (*о животных*) туҡланыу, түл йыйыу **2.** *сад.* (*о деревьях*) буйға үҫеү (*емеш бирмәйенсә*)

**ЖИРОВИ́К** *м*; *мед.* оро (*кешелә*)

**ЖИРОВО́Й,** -ая, -ое **1.** май, майлы; **жировы́е отложе́ния** май үреү; **жировы́е вещества́** майлы матдәләр **2.** май, май эшкәртеү ...ы; **жирово́й комбина́т** май эшкәртеү комбинаты

**ЖИРОЗАМЕНИ́ТЕЛЬ** *м* май(ҙы) алмаштырыусы, яһалма май; **синтети́ческий жирозамени́тель** синтетик май

**ЖИРОПО́Т** *м*; *спец.* йөн майы (*һарыҡтарҙың май һәм тир биҙҙәре бүлеп сығарған матдә*); **из жиропо́та добыва́ется ланоли́н** йөн майынан ланолин алалар

**ЖИРОПРИКА́З** *м*; *фин.* жироприказ (*аҡса хужаһының кредитор менән хисаплашырға биргән яҙма бойороғо*)

**ЖИРОТО́ПНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* май иретеү (һыҙғыртыу) ...ы; **жирото́пный заво́д** май иретеү заводы

**ЖИТЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое тормош (донъя) ...ы; **жите́йский о́пыт** тормош тәжрибәһе; **жите́йские хло́поты** донъя мәшәҡәттәре; **жите́йская суета́** донъя ығы-зығыһы ♦ **жите́йский ум** ҡара аҡыл; **де́ло жите́йское** *в знач. сказ.* көн дә була торған эш

**ЖИ́ТЕЛЬ** *м* йәшәүсе, тороусы ир-ат, йәшәгән (торған) халыҡ; **жи́тельница** *ж* йәшәүсе (тороусы) ҡатын-ҡыҙ; **жи́тели го́рода** ҡалала йәшәүселәр; **коренно́й жи́тель** төп (ерле) халыҡ; **дереве́нская жи́тельница** ауылда йәшәүсе ҡатын-ҡыҙ

**ЖИ́ТЕЛЬСТВО** *с* йәшәү (тороу) ...ы; **ме́сто жи́тельства** йәшәү урыны

**ЖИ́ТНИЦА** *ж* **1.** *уст.* амбар, келәт **2.** *перен.* игенгә бай ер (өлкә)

**ЖИТНЯ́К** *м* арышбаш, бесәйғойроҡ

**ЖИ́ТО** *с* ашлыҡ, иген

**ЖИТЬ** *несов.*; *в разн. знач.* йәшәү, тороу, ғүмер итеү, көн итеү (күреү); **жить до́лго** оҙаҡ йәшәү; **жить в дере́вне** ауылда йәшәү; **жить самостоя́тельно** үҙ алдына йәшәү; **жить бога́то** бай йәшәү; **жить в сердца́х люде́й** халыҡ күңелендә йәшәү; **жить на кварти́ре** фатирҙа тороу; **жить вме́сте** бергә ғүмер итеү; **жить на стипе́ндию** стипендияға көн итеү; **жить на одно́м хле́бе** икмәк менән генә көн итеү; **жить воспомина́ниями** хәтирәләр менән йәшәү; **жить для дете́й** балалар өсөн йәшәү ♦ **жить свои́м умо́м** үҙ аҡылың менән йәшәү; **жить чужи́м умо́м** кеше аҡылы менән йәшәү

**ЖИТЬЁ** *с*; *разг.* **1.** тормош, көнкүреш, **сла́вное житьё** рәхәт тормош; **дереве́нское житьё** ауыл тормошо **2.** йәшәү, тороу; **найти́ ме́сто для житья́** торорға урын табыу ♦ **житья́ нет** *кому, от кого* көн юҡ

**ЖИ́ТЬСЯ** *несов. кому безл.*; *разг.* (*в сочетании с нареч. "хорошо", "легко", "плохо", "трудно" и т.д.*) йәшәү, тороу, йәшәлеү, торолоу; **хорошо́ жило́сь** яҡшы йәшәлде; **тру́дно живётся без подде́ржки** таянысһыҙ йәшәүе ауыр

**ЖМУ́РИТЬ: жму́рить глаза́** күҙ ҡыҫыу (йомоу)

**ЖМУ́РИТЬСЯ** *несов.* күҙ ҡыҫыу (йомоу), ҡыҫылыу (*күҙгә ҡарата*); **жму́риться от све́та** яҡтынан күҙ ҡыҫылыу (*яҡтыға ҡарай алмай күҙҙе йомоу*)

**ЖМУ́РКИ** *только мн.* һәпәләк, һуҡыр тәкә, күҙ бәйләм; **игра́ть в жму́рки** һәпәләк уйнау

**ЖМЫХИ́** и **ЖМЫ́ХИ** *мн.* (*ед.* **жмых** *м*) төпрә (*орлоҡтан май һыҡҡандағы ҡалдыҡ*); **подсо́лнечный жмых** көнбағыш төпрәһе

**ЖМЫ́ХОВЫЙ** и **ЖМЫХО́ВЫЙ,** -ая, -ое төпрә ...ы; **жмы́ховые корма́** төпрә аҙыҡтар

**ЖНЕ́ЙКА** *ж* урғыс, урғыс машина

**ЖНЕЦ** *м* и **ЖНИ́ЦА** *ж* ураҡсы

**ЖНИВЬЁ** *с* **1.** ҡамыл, ҡаулан (*игене алынып, һөрөлмәй ятҡан ер*) **2.** (*стерня*) ҡамыл; **ржано́е жнивьё** арыш ҡамылы

**ЖОКЕ́Й** *м* жокей (*сабышта ҡатнашыусы, ат өҫтөндә йөрөүсе*)

**ЖОМ** *м* **1.** (*пресс*) һыҡҡыс **2.** (*свекловичные выжимки*) һығынды

**ЖОНГЛЁР** *м* жонглёр (*цирк артисы*)

**ЖОНГЛЁРСТВО** *с* **1.** жонглёрлыҡ **2.** *перен.* факттарҙы бутау (үҙе теләгәнсә), әүеш-тәүеш килтереү

**ЖОНГЛИ́РОВАТЬ** *несов. чем* **1.** жонглёрлыҡ итеү (*цирҡта*) **2.** *см.* **жонглёрство** 2

**ЖРАТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *прост.* ашау, тығыныу

**ЖРЕ́БИЙ** *м* **1.** йәрәбә, шыбаға; **броса́ть жре́бий** йәрәбә һалыу; **тяну́ть жре́бий** йәрәбә тартыу; **доста́ться по жре́бию** йәрәбә менән сығыу **2.** *перен.*, *трад.-поэт.* (*участь*) яҙмыш, тәҡдир

**ЖРЕЦ** *м* и **ЖРИ́ЦА** *ж* **1.** ҡанбаба, жрец (*мәжүсиҙәрҙә ҡорбан салыусы*) **2.** *перен.*, *уст.* әһел; **жрецы́ нау́ки и иску́сства** фән һәм сәнғәт әһелдәре

**ЖУ́ЖЕЛИЦА** *ж* бызылдауыҡ (*төнгө ҡуңыҙ*)

**ЖУЖЖА́ТЬ** *несов.* безелдәү, безләү, бызылдау, тызылдау, выжлау, выжлап тороу, гөжләү, гөж килеү, геүләү; **жужжа́т пчёлы** бал ҡорттары гөж килә; **жужжа́т пу́ли** пулялар выжлап тора; **мото́р жужжи́т** мотор геүләй

**ЖУК** *м* ҡуңыҙ; **ма́йский жук** май ҡуңыҙы

**ЖУ́ЛИК** *м* **1.** ҡараҡ, бур **2.** *разг.* (*мошенник*) алдаҡсы, мут, жулик

**ЖУЛИКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое алдаша (мутлаша) торған

**ЖУЛЬЁ** *с собир.*; *разг.* ҡараҡтар

**ЖУ́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* алдашыу, мутлашыу

**ЖУ́ЛЬНИЧЕСТВО** *с*; *разг.* алдыҡ эш, мутлыҡ, хәйләләү

**ЖУПА́Н** *м* ҡыҫҡа сәкмән (*поляк һәм украиндарҙа ирҙәр кейеме*)

**ЖУ́ПЕЛ** *м* (*нечто, внушающее страх, ужас*) ҡараҫҡы

**ЖУРАВЛЁНОК** *м* торна балаһы, бала торна

**ЖУРАВЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое торна ...ы; **журавли́ный крик** торна тауышы; **журавли́ная ста́я** торна тубы; **журавли́ный та́нец** торналар уйнауы

**ЖУРА́ВЛЬ** *м* **1.** торна; **се́рый жура́вль** һоро торна; **са́мка журавля́** инә торна **2.** (*у колодца*) сиртмә; **коло́дезный жура́вль** сиртмәле ҡоҙоҡ

**ЖУРИ́ТЬ** *несов. кого*; *разг.* орошоу, шелтәләү

**ЖУРНА́Л** *м* журнал; **ежеме́сячный журна́л** ай һайын сыҡҡан журнал; **литерату́рный журна́л** әҙәби журнал; **запи́сывать све́дения в журна́л** мәғлүмәттәрҙе журналға яҙып барыу

**ЖУРНАЛИ́СТ** *м* и **ЖУРНАЛИ́СТКА** *ж* журналист; **Сою́з журнали́стов РБ** БР журналистар союзы

**ЖУРНАЛИ́СТИКА** *ж* журналистика; **занима́ться журнали́стикой** журналистика менән шөғөлләнеү

**ЖУРНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое журнал ...ы; **журна́льная статья́** журнал мәҡәләһе

**ЖУРЧА́НИЕ** *с см.* **журчать** 1; **слы́шно говорли́вое журча́ние ручейко́в** гөрләүектәр сылтырап аҡҡаны ишетелә

**ЖУРЧА́ТЬ** *несов.* **1.** селтерәү, сылтырау, шылтырау; **в овра́ге ти́хо журча́л руче́й** соҡор төбөнән селтерәп кенә шишмә аға **2.** *перен.* аҡрын ғына, мөңгөрләп кенә ишетелеү (*тауыш, музыка һ.б.*)

**ЖУ́ТКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*страшный*) ҡот осҡос, ҡурҡыныс, дәһшәтле; **жу́ткие карти́ны бо́я** ҡот осҡос һуғыш күренештәре **2.** (*тягостный*) ауыр, күңелһеҙ; **произвести́ жу́ткое впечатле́ние** ауыр тәьҫир итеү, күңелһеҙ тәьҫир ҡалдырыу

**ЖУ́ТКО 1.** *нареч.* ҡот осҡос, ҡурҡыныс; **он вы́глядел жу́тко** ул ҡот осҡос ҡиәфәттә ине **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* ҡурҡыныс, хәүефле; **бы́ло жу́тко в темноте́** ҡараңғыла ҡурҡыныс ине

**ЖУТЬ** *ж*; *разг.* ҡурҡыу, хәүефләнеү (хисе); **меня́ жуть берёт** мин ҡурҡам ♦ **до жу́ти** бик ныҡ; **надое́сть до жу́ти** бик ныҡ йәнгә тейеү

**ЖУ́ХЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о листьях, траве*) ҡыу, ҡыуарған, һарғайып ҡороған; **прошлого́дняя жу́хлая трава́** былтырғы ҡыу үлән; **жу́хлые ли́стья** ҡыуарған япраҡтар **2.** (*о красках*) тоноҡ, тоноҡланған, уңған

**ЖУ́ХНУТЬ** *несов.* **1.** (*о растениях*) һарғайыу, ҡороу, ҡыуарыу; **хлеба́ ста́ли жу́хнуть на корню́** иген ултырған көйө һарғая башланы **2.** (*о красках*) тоноҡланыу, төҫө бөтөү, уңыу

**ЖЮРИ́** *с нескл.*, *собир.* жюри; **реше́ние жюри́** жюри ҡарары; **чле́ны жюри́** жюри ағзалары

# З

**ЗА** *предлог* **1.** *с вин. п.* (*при указании на направление движения за пределы чего-л.*) аръяғына, артына, тышына, ситенә; **вы́ехать за́ город** ҡала ситенә сығыу; **вы́нести за ско́бки** йәйәләр тышына сығарыу; **уйти́ за ре́ку** йылға аръяғына китеү

**2.** *с вин. п.* (*при указании предмета, места, лица, по другую сторону которого что-л. помещено*) -ға/-гә, эсенә, артына; **су́нуть за па́зуху** ҡуйынға тығыу; **поста́вить за шкаф** шкаф артына ҡуйыу

**3.** *с вин. п.* (*при указании на место вокруг, около чего-л., рядом с чем-л.*) артына, янына, эргәһенә; **сесть за стол** өҫтәл артына ултырыу; **сесть за руль** руль артына ултырыу

**4.** *с вин. п.* (*при указании на начало действия, обычно с глаголом*) -ға/-гә; **взя́ться за рабо́ту** эшкә тотоноу; **приня́ться за учёбу** уҡырға керешеү

**5.** *с вин. п.* (*при указании на промежуток времени, в течение которого совершается что-л.*) -да/-дә, эсендә, буйында; **за после́дние го́ды** һуңғы йылдарҙа; **за ле́то** йәй эсендә; **сде́лать за два часа́** *что-л. нимәнелер* ике сәғәт эсендә эшләү

**6.** *с вин. п.* (*при указании на время, отделяющее одно событие от другого*) алда(н), элек, элгәре; **за не́сколько дней** бер нисә көн элек; **за час до отправле́ния по́езда** поезд китерҙән бер сәғәт алда

**7.** *с вин. п.* (*при указании на превышение предела, меры*) -дан/-дән ашыу (артыу); **моро́з за два́дцать гра́дусов** һыуыҡ егерме градустан арткан; **ей далеко́ за со́рок** йәше күптән ҡырҡтан уҙған

**8.** *с вин. п.* (*при указании на расстояние*) арала, алыҫлыҡта, ерҙә; **находи́ться за де́сять киломе́тров от го́рода** ҡаланан ун километр алыҫлыҡта булыу

**9.** *с вин. п.* (*при указании причины*) өсөн; **благодари́ть за услу́гу** хеҙмәт өсөн рәхмәт әйтеү; **за что его́ люби́ть?** нимәһе өсөн уны яратырға?

**10.** *с вин. п.* (*при указании цели действия, предмета, лица, в защиту которого совершается действие*) өсөн; **отда́ть жизнь за Ро́дину** Ватан өсөн ғүмерҙе биреү (фиҙа ҡылыу)

**11.** *с вин. п.* (*при обозначении цены*) -ға/-гә, өсөн; **купи́ть за пять рубле́й** биш һумға һатып алыу; **уплати́ть за кварти́ру** фатир өсөн түләү

**12.** *с вин. п.* (*при указании лица, вместо которого кто-л. действует*) өсөн, урынына; **рабо́тать за това́рища** иптәш(е) өсөн эшләү; **расписа́ться за жену́** ҡатыны өсөн ҡул ҡуйыу

**13.** *с вин. п.* (*указывает на лицо, предмет, на который направлено действие*) -дан/-дән; **взять за́ руку** ҡулдан тотоу; **тяну́ть за верёвку** бауҙан тартыу

**14.** *с вин. п.* (*при обозначении лица, предмета, который вызывает какое-л. чувство*) өсөн; **красне́ть за дру́га** дуҫ өсөн ҡыҙарыу; **я рад за вас** һеҙҙең өсөн шатмын

**15.** *с вин. п.* (*при указании на то, в каком качестве воспринимается кто-что-л.*) итеп, тип; **приня́ть за пра́вило** ҡағиҙә итеп ҡабул итеү; **счита́ть за честь** намыҫ эше тип һанау

**16.** *с твор. п.* (*при указании на предмет, место, позади которого происходит действие*) артында, ситендә; **жить за́ городом** ҡала ситендә йәшәү; **за горо́й** тау артында; **стоя́ть за две́рью** ишек артында тороу; **со́лнце скры́лось за ту́чами** ҡояш болот артына йәшенде

**17.** *с твор. п.* (*при указании на место вокруг, около чего-л., рядом с чем-л., где происходит действие*) артында, эргәһендә, янында; **сиде́ть за столо́м** өҫтәл янында ултырыу

**18.** *с твор. п.* (*при обозначении движения, следования за кем-чем-л.*) артынан, арттан; **гна́ться за ма́льчиками** малайҙар артынан ҡыуыу; **сле́дуйте за на́ми!** беҙҙең арттан барығыҙ!

**19.** *с твор. п.* (*при указании на непрерывность следования одного за другим*) артынан, һуңынан, бер-бер артлы; **за весно́й наступа́ет ле́то** яҙ артынан йәй килә; **день за днём** көн артынан көн; **оди́н за други́м** береһе артынан икенсеһе, бер-бер артлы

**20.** *с твор. п.* (*при указании на причину*) сәбәпле; **за неиме́нием вре́мени** ваҡыт булмау сәбәпле; **за нена́добностью** кәрәкмәү сәбәпле

**21.** *с твор. п.* (*при указании лица, предмета, ради получения которого совершается действие*) артынан, маҡсатынан сығып, -ға/-гә; **пойти́ за водо́й** һыуға барыу; **посла́ть за врачо́м** табип артынан ебәреү

**22.** *с твор. п.* (*при указании на лицо, предмет, который является объектом действия*) -ды/-де; **уха́живать за больны́м** ауырыуҙы ҡарау; **следи́ть за чистото́й** таҙалыҡты һаҡлау (тотоу); **смотре́ть за ребёнком** баланы ҡарау

**23.** *с твор. п.* (*при указании на лицо, предмет, от которого зависит наступление какого-л. действия*) -да/-дә; **де́ло за ва́ми** эш һеҙҙә (ҡалды); **о́чередь за мной** сират миндә, минең сират

**24.** *с твор. п.* (*при указании на лицо, предмет, которому присущи те или иные свойства*) -ды/-де; **замеча́ть за ученико́м недоста́тки** уҡыусыла етешһеҙлектәр күреү

**25.** *с твор. п.* (*при указании на номер, подпись и т.п. внешние признаки документа*) -лы/-ле, булған, менән; **прика́з за по́дписью дире́ктора** директорҙың ҡултамғаһы булған приказ; **де́ло за но́мером два** икенсе һанлы дело

**26.** *в знач. сказ.* ыңғай; **все за, он оди́н про́тив** бөтәһе ыңғай, ул бер үҙе ҡаршы

**ЗА...** *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: 1) *эш-хәлдең башланыуын*: **запла́кать** илап ебәреү; **засмея́ться** көлөп ебәреү; 2) *эш-хәлдең һөҙөмтәһенә ирешеүҙе*: **завоева́ть** яулап алыу; **захвати́ть** ҡулға төшөрөү; 3) *эш-хәлдең артыҡлығын, сиктән сығып китеүен*: **загляде́ться** оҙаҡ ҡарап тороу; **засиде́ться** оҙаҡ ултырып ташлау; 4) *хәрәкәттең ниҙеңдер артына йәки берәй яҡҡа йүнәлгәнлеген*: **заверну́ть за́ угол** мөйөшкә боролоу; **зайти́ за де́рево** ағас артына йәшенеү; 5) *эш-хәрәкәттең юл ыңғайында башҡарылыуын*: **забежа́ть** инеп сығыу; **занести́** индереп сығыу **2.** *исем йәки сифат яһағанда ҡулланылып, икенсе яҡта йәки артта булыуҙы аңлата*: **за́городный** ҡаланан ситтәге; **заре́чный** йылға аръяғындағы

**ЗААКТИ́РОВАТЬ** *сов. что* акт төҙөү

**ЗААЛЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*выделиться алым цветом*) алланып (алһыуланып, ҡыҙарып) күренеү; **заале́ли гро́здья ряби́ны** миләш тәлгәштәре ҡыҙарып күренде **2.** (*начать алеть*) аллана (ҡыҙара) башлау; **восто́к заале́л** көнсығыш ҡыҙара башланы

**ЗААПЛОДИ́РОВАТЬ** *сов.* алҡышлай (ҡул саба) башлау; **зал зааплоди́ровал** зал алҡышлай башланы

**ЗААРЕНДОВА́ТЬ** *сов. что* ҡуртымға (арендаға) алыу, ҡуртымлау, арендалау; **заарендова́ть зе́млю** ерҙе арендаға алыу

**ЗААРЕНДО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **заарендова́ть**

**ЗААРКА́НИВАТЬ** *несов. см.* **заарка́нить**

**ЗААРКА́НИТЬ** *сов. кого-что* **1.** арҡанлау, боғал һалыу, боғаллап ҡуйыу; **заарка́нить ло́шадь** атты боғаллап ҡуйыу **2.** *перен.* арҡанлау, иркен сикләү

**ЗААРТА́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* киреләнеү, тиҫкәреләнеү, ҡарышыу, сығынсылау

**ЗААСФАЛЬТИ́РОВАТЬ** *сов. что* асфальтлау, асфальт түшәү; **заасфальти́ровать у́лицу** урамға асфальт түшәү

**ЗААТЛАНТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое Атлантик океан аръяғындағы; **заатланти́ческие стра́ны** Атлантик океан аръяғындағы илдәр

**ЗАБА́ВА** *ж* **1.** (*игра, развлечение*) уйын, мәрәкә, уйын-көлкө, йыуаныс; **де́тские заба́вы** балалар уйыны **2.** (*несерьёзное занятие*) ирмәк, мәрәкә; **пуста́я заба́ва** буш мәрәкә

**ЗАБАВЛЯ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*развлекать*) албырғатыу, алдаштырыу, әүрәтеү; **забавля́ть дете́й** балаларҙы алдаштырыу **2.** (*смешить, веселить*) көлдөрөү, күңелде асыу (күтәреү), мәрәкәләү; **вы меня́ забавля́ете** һеҙ минең күңелде асаһығыҙ

**ЗАБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. чем* и *без доп.* албырғау, йыуаныу, әүрәү, ҡыҙыҡ күреү, ирмәк табыу; **забавля́ться и́грами** уйындан ирмәк табыу

**ЗАБА́ВНИК** *м*; *разг.* уйынсаҡ, мәрәкәсел, мәҙәксән, шуҡ, шаян

**ЗАБА́ВНО 1.** *нареч.* ҡыҙыҡ (көлкө) итеп; **он заба́вно расска́зывает** ул ҡыҙыҡ итеп һөйләй **2.** *кому в знач. сказ.* ҡыҙыҡ, ирмәк, мәрәкә; **мне э́то заба́вно** был миңә ҡыҙыҡ

**ЗАБА́ВНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡ, көлкө(лө), ирмәк, мәрәкә; **заба́вный слу́чай** ҡыҙыҡ ваҡиға; **заба́вный челове́к** ирмәк кеше

**ЗАБАЛЛОТИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* һайламау, һайламай ҡалдырыу; **забаллоти́ровать кандида́та** кандидатты һайламай ҡалдырыу

**ЗАБАЛЛОТИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **забаллоти́ровать**

**ЗАБА́ЛТЫВАТЬ** *несов. см.* **заболта́ть** I

**ЗАБА́ЛТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **заболта́ться** I

**ЗАБАРАБА́НИТЬ** *сов.* **1.** (*на барабане*) барабан ҡаға башлау **2.** (*застучать*) дыңғырлата, дөбөрләтә (тыпырлата) башлау; **дождь забараба́нил** ямғыр тыпылдап яуа башланы; **забараба́нить в дверь** ишекте дөбөрләтә башлау

**ЗАБАРРИКАДИ́РОВАТЬ** *сов. что* баррикадалау, баррикада ҡороу (яһау); **забаррикади́ровать у́лицу** урамға баррикада ҡороу

**ЗАБАРРИКАДИ́РОВАТЬСЯ** *сов.* баррикада ҡороп ышыҡланыу

**ЗАБАСТОВА́ТЬ** *сов.* эш ташлау, забастовка яһау

**ЗАБАСТО́ВКА** *ж* эш ташлау, забастовка; **всео́бщая забасто́вка** дөйөм забастовка; **полити́ческая забасто́вка** сәйәси забастовка; **объяви́ть забасто́вку** забастовка иғлан итеү

**ЗАБАСТО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое забастовка ...ы; **забасто́вочный комите́т** забастовка комитеты; **забасто́вочное движе́ние** забастовка хәрәкәте

**ЗАБАСТО́ВЩИК** *м* эш ташлаусы, забастовкасы

**ЗАБВЕ́НИЕ** *с* **1.** *книжн.* онотоу, иҫтән сығарыу; **забве́ние обя́занностей** бурысты онотоу; **преда́ть забве́нию** *что-л.* *нимәнелер* онотоу, бөтөнләй иҫтән сығарыу **2.** (*забытьё*) иҫһеҙ-һушһыҙ булыу; **вы́йти из забве́ния** һушына (иҫенә) килеү

**ЗАБЕ́Г** *м*; *спорт.* йүгереү, йүгереш, уҙыш; **уча́ствовать в забе́ге** йүгерештә ҡатнашыу; **забе́г на четы́реста ме́тров** дүрт йөҙ метрға йүгереү

**ЗАБЕГА́ЛОВКА** *ж*; *прост.* забегаловка, тәғәмхана (*тиҙ генә ашап-эсеп сыға торған урын*); **обе́дать в забега́ловке** забегаловкала төшкөнө ашау

**ЗАБЕГА́НИЕ** *с* артыҡ ашығыслыҡ (*эштә, ҡылыҡта*); **забега́ние вперёд** артыҡ ашығыслыҡ

**ЗАБЕ́ГАТЬ** *сов.* **1.** йүгереклəү, йүгерешə башлау; **все забе́гали при приближе́нии по́езда** поезд яҡынлашҡас, барыһы ла йүгерешə башланы **2.** (*о глазах, взгляде*) алаңлау, уйнау; **глаза́ его́ забе́гали** уның күҙҙəре алаңлай башланы

**ЗАБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **забежа́ть**

**ЗАБЕ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йүгерə-йүгерə арыу (хəлдəн тайыу); **ма́льчик совсе́м забе́гался** малай йүгерə-йүгерə бөтөнлəй арыны; **сего́дня я забе́гался** бөгөн мин йүгерə-йүгерə хəлдəн тайҙым

**ЗАБЕЖА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** йүгереп (барып, килеп) инеү; **забежа́ть во двор** ихатаға барып инеү **2.** (*зайти на короткое время, мимоходом*) инеп кенə сығыу, юл ыңғай(ы) инеп сығыу; **забежа́ть к дру́гу** дуҫҡа юл ыңғайы инеп сығыу **3.** (*убежать вперёд, опередить*) алға уҙып (үтеп) китеү, алдан йүгереү (сабыу)

**ЗАБЕЛЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ағарып күренеү (*аҡ, асыҡ төҫлө нəмəлəр тураһында*); **вдали́ забеле́л па́рус** алыҫта елкəн ағарып күренде **2.** ағара (яҡтыра) башлау; **за окно́м забеле́ло** тыш(та) яҡтыра башланы

**ЗАБЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **забели́ть**

**ЗАБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ағартыу, аҡлау, аҡҡа буяу; **забели́ть сте́ны** стеналарҙы ағартыу **2.** *прост.* ҡатыу, һалыу, аҡ итеү (*аш-һыуҙы*); **забели́ть чай молоко́м** сəйгə һөт һалыу

**ЗАБЕ́ЛКА** *ж*; *прост.* аҡ (*аш-һыуға ҡатыла, һалына торған*); **смета́на для забе́лки су́па** ашҡа һалына торған ҡаймаҡ; **щи с забе́лкой** аҡ ҡатылған щи

**ЗА́БЕРЕГИ** *мн.* (*ед.* **за́берег** *м* и **за́берега** *ж*) **1.** яр буйындағы боҙ һыҙаты; **берега́ реки́ покры́лись за́берегами** йылға ярҙары боҙ һыҙаты менəн ҡапланды **2.** һыҙа; **на о́зере появи́лись за́береги** күлдə һыҙалар барлыҡҡа килде

**ЗАБЕРЕ́МЕНЕТЬ** *сов.* балаға (ауырға, буйға) ҡалыу, йөккə уҙыу

**ЗАБЕСПОКО́ИТЬ** *сов.* борсой (тынғыһыҙлай) башлау; **э́то забеспоко́ило мно́гих** был күптəрҙе тынғыһыҙлай башланы

**ЗАБЕСПОКО́ИТЬСЯ** *сов.* тынғыһыҙлана (хафалана, борсола) башлау; **мать забеспоко́илась** əсə борсола башланы

**ЗАБЕТОНИ́РОВАТЬ** *сов. что* бетонлап ҡуйыу; **забетони́ровать тонне́ль** тоннелдə бетонлап ҡуйыу

**ЗАБИВА́ТЬ** *несов. см.* **заби́ть** I

**ЗАБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заби́ться** I; **2.** *страд. от* **забива́ть**

**ЗАБИНТОВА́ТЬ** *сов. кого-что* бинтлау, бинт менəн бəйлəп ҡуйыу; **забинтова́ть ра́ну** яраны бинт менəн бəйлəп ҡуйыу

**ЗАБИНТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **забинтова́ть**

**ЗАБИРА́ТЬ** *несов. см.* **забра́ть**

**ЗАБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **забра́ться** **2.** *страд. от* **забира́ть**

**ЗАБИ́ТОСТЬ** *ж* баҫылғанлыҡ, баҫылып йəшəү, бахырлыҡ, байғошлоҡ

**ЗАБИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заби́ть** I; **2.** *прил.* ҡағылып-һуғылған, ҡыйырһытылған; **заби́тый челове́к** ҡағылып-һуғылған кеше

**ЗАБИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* ҡағыу, ҡаҙаҡлау; **заби́ть гвоздь** ҡаҙаҡ ҡағыу **2.** *спорт.* (тибеп, һуғып) индереү; **заби́ть мяч в воро́та** ҡапҡаға туп индереү **3.** *что* бөтəштереү, томалау, ҡаплау; **заби́ть окно́ до́сками** тəҙрəне таҡта менəн ҡаплап ҡуйыу **4.** *что* (*заполнить до отказа*) тултырыу, тыңҡыслап тултырыу; **заби́ть сара́й дрова́ми** һарайға утын тултырыу **5.** *кого* (*замучить побоями*) туҡмап йонсотоу **6.** *перен.* (*довести до отупения, запугать*) ҡурҡытып ҡуйыу, ҡотон алып бөтөү **7.** *что* (*заглушить — о растениях*) баҫып китеү, ҡаплап алыу; **сорняки́ заби́ли всхо́ды пшени́цы** ҡый үлəндəре бойҙай шытымдарын баҫып киткəн **8.** *кого* (*убить на бойне, на охоте*) һуйыу, салыу, боғаҙлау; **заби́ть быка́** үгеҙ һуйыу ♦ **заби́ть го́лову** *кому, чем* башын ҡаңғыртыу (бутау); **заби́ть себе́ в го́лову** башҡа һеңдереү, баштан сығармау, баш ватыу

**ЗАБИ́ТЬ II** *сов.* **1.** ҡағыу, туҡылдатыу; **ло́шадь заби́ла копы́тами** ат тояҡтары менəн туҡылдата **2.** (*застучать*) ҡағыу; **дождь заби́л в окно́** ямғыр тəҙрəгə ҡаға башланы **3.** (*дать сигнал ударами*) ҡаға (һуға) башлау, ҡағыу, һуғыу; **заби́ли бараба́ны** барабан ҡаға башланылар; **заби́ли часы́** сəғəт һуға башланы **4.** (*начать вытекать струёй*) урғылыу, урғып сығыу, атылыу; **из сква́жины заби́ла нефть** скважинанан нефть урғыла башланы ♦ **заби́ть козла́** *прост.* домино уйнау (һуғыу)

**ЗАБИ́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** *разг.* йəшеренеү, боҫоу; **заби́ться в у́гол** мөйөшкə боҫоу **2.** (*засориться*) тығылыу, ҡапланыу; **труба́ заби́лась песко́м** торбаға ҡом тығылған

**ЗАБИ́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** (*начать биться*) ҡаға (һуға, бəрə, тибə) башлау; **се́рдце заби́лось** йөрəк ҡаға башланы; **во́лны заби́лись о бе́рег** тулҡындар ярға ҡаға башланы **2.** (*заметаться*) тулау, тулғаныу; **больно́й заби́лся в припа́дке** ауырыу, өйəнəге тотоп, тулай башланы

**ЗАБИЯ́КА** *м* и *ж*; *разг.* һуғыш суҡмары, бəйлəнсек, сəркəш

**ЗАБЛАГОВРЕ́МЕННО** *нареч.* алдан, көн элгəре, ваҡытынан элек; **извести́ть заблаговре́менно** алдан хəбəр итеү

**ЗАБЛАГОВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое алдан (көн элгəре) булған

**ЗАБЛАГОРАССУ́ДИТЬСЯ** *сов. безл.* дөрөҫ тип табылыу, кəрəк һаналыу, үҙе белгəнсə эшлəү; **он де́лает всё, что ему́ заблагорассу́дится** ул бөтəһен дə үҙе белгəнсə эшлəй

**ЗАБЛЕСТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*начать блестеть*) йылтырай (йымылдай) башлау, йылтырап китеү; **его́ глаза́ заблесте́ли** уның күҙҙəре йылтырап

китте **2.** (*показаться — о чём-л. блестящем*) ялтырап китеү, ялтырап күренеү; **вдали́ заблесте́ло о́зеро** алыҫта күл ялтырап күренде

**ЗАБЛЕ́ЯТЬ** *сов.* баҡыра башлау

**ЗАБЛИСТА́ТЬ** *сов. см.* **заблесте́ть**

**ЗАБЛУДИ́ТЬСЯ** *сов.* аҙашыу, юлдан яҙыу; **заблуди́ться в лесу́** урманда аҙашыу ♦ **заблуди́ться в трёх сосна́х** ябай нәмәне лә төшөнмәү, өс быҙауға кәбәк айыра белмәү

**ЗАБЛУ́ДШИЙ,** -ая, -ее *уст.* **1.** аҙашҡан **2.** *перен.* дөрөҫ юлдан яҙған, боҙоҡ юлға баҫҡан ♦ **заблу́дшая овца́** юлдан яҙған кеше (*цҙенең йәмғиәтенән, ғаиләһенән һ.б. ситләшкән*)

**ЗАБЛУЖДА́ТЬСЯ** *несов.* хаталаныу, яңылыш фекерҙә (ҡараашта) тороу (булыу); **вы заблужда́етесь относи́тельно меня́** һеҙ минә ҡарата яңылыш фекерҙәһегеҙ

**ЗАБЛУЖДЕ́НИЕ** *с см.* **заблужда́ться**; **впасть в заблужде́ние** яңылыш фекерҙә булыу; **быть в заблужде́нии** хаталаныу, яңылыш фекерҙә тороу; **ввести́ в заблужде́ние** яңылыштырыу, хата фекергә төшөрөү

**ЗАБОДА́ТЬ** *сов. кого-что* һөҙөп имгәтеү (үлтереү)

**ЗАБО́Й I** *м*; *горн.* забой (*шахтала мәғдән, күмер һ.б. сығарыу урыны*)

**ЗАБО́Й II** *м* **1.** *см.* **заби́ть** I 9; **забо́й скота́** мал һуйыу **2.** (*количество забитого скота*) һуйылған мал иҫәбе

**ЗАБО́ЙНЫЙ I,** -ая, -ое *горн.* забой ...ы; **забо́йное крепле́ние** забой нығытмаһы

**ЗАБО́ЙНЫЙ II,** -ая, -ое һуйыла торған; **забо́йный скот** һуйыла торған мал

**ЗАБО́ЙЩИК** *м*; *горн.* забойсы (*забойҙа эшләүсе*)

**ЗАБОЛА́ЧИВАНИЕ** *с см.* **забола́чивать, забола́чиваться**; **забола́чивание ни́зменности** уйһыулыҡтың һаҙға әйләнеүе

**ЗАБОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **заболо́тить**

**ЗАБОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заболо́титься 2.** *страд. от* **забола́чивать**

**ЗАБОЛЕВА́ЕМОСТЬ** *ж* ауырыу, ауырыуҙар һаны; **де́тская заболева́емость** балалар ауырыуы; **сниже́ние заболева́емости** ауырыуҙар һаны кәмеү

**ЗАБОЛЕВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **заболева́ть 2.** (*болезнь*) ауырыу, сир, сырхау; **инфекцио́нное заболева́ние** инфекцион ауырыу; **тяжёлое заболева́ние** ҡаты сир

**ЗАБОЛЕВА́ТЬ** *несов. см.* **заболе́ть** I

**ЗАБОЛЕ́ТЬ I** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* ауырып китеү, сирләү; **заболе́ть гри́ппом** грипп менән ауырып китеү; **мой брат заболе́л** ағайым ауырып китте **2.** *кем-чем*; *разг.* (*увлечься*) мауығып китеү; **заболе́ть рыба́лкой** балыҡ тотоу менән мауығып китеү

**ЗАБОЛЕ́ТЬ II** *сов.* (*начать болеть*) ауырта башлау; **у меня́ заболе́ла голова́** минең башым ауырта башланы

**ЗА́БОЛОНЬ** *ж*; *бот.* сөсөк (*ағастың ҡабығы аҫтындағы йәш ҡатлам*)

**ЗАБОЛО́ТИТЬ** *сов. что* һаҙға әйләндереү, һаҙландырыу; **заболо́тить по́чву** тупраҡты һаҙға әйләндереү

**ЗАБОЛО́ТИТЬСЯ** *сов.* һаҙға (һаҙлыҡҡа) әйләнеү; **земля́ заболо́тилась** ер һаҙлыҡҡа әйләнде

**ЗАБОЛО́ЧЕННОСТЬ** *ж* һаҙға әйләнеү, һаҙамыҡ булыу, һаҙматлыҡ; **заболо́ченность доли́ны** үҙәндең һаҙматлығы

**ЗАБОЛО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заболо́тить 2.** *прил.* һаҙға әйләнгән, һаҙмат, һаҙланған; **заболо́ченный луг** һаҙмат болон

**ЗАБОЛТА́ТЬ I** *сов.*; *прост.* (*размешать*) болғатыу, туҡыу, бутау; **заболта́ть те́сто** ҡамыр болғатыу

**ЗАБОЛТА́ТЬ II** *сов.*; *разг.* **1.** *чем* (*начать болтать*) болғау, һелкетеү; **заболта́ть нога́ми** аяҡ һелкетеү **2.** *кого-что безл.*; *разг.* болғандырыу, һелкендереү; **ло́дку заболта́ло** кәмәне һелкетә башланы

**ЗАБОЛТА́ТЬ III** *сов.*; *разг.* һөйләнеү, артыҡ күп һөйләү; **заболта́ть пробле́му** проблема тураһында артыҡ күп һөйләү

**ЗАБОЛТА́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* (*увлечься болтовнёй*) гәп менән мауығып китеү, оҙон хәбәргә төшөп китеү, лығырлау

**ЗАБОЛТА́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* (*из стороны в сторону*) болғаңлау, сайҡалыу

**ЗАБО́Р** *м* ҡойма; **доща́тый забо́р** таҡта ҡойма; **обнести́ забо́ром** ҡоймалау, ҡойма ҡуйыу

**ЗАБОРА́НИВАТЬ** *несов. см.* **заборони́ть**

**ЗАБО́РИСТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** (*едкий, крепкий*) ҡаты, үткер, тәьҫирле; **забо́ристый таба́к** ҡаты тәмәке **2.** *перен.* мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡ; **забо́ристая пе́сня** мауыҡтырғыс йыр

**ЗАБОРМОТА́ТЬ** *сов.* һөйләнә башлау, мығырлау

**ЗАБО́РНЫЙ,** -ая, -ое ҡойма ...ы; **забо́рный столб** ҡойма бағанаһы

**ЗАБОРОНИ́ТЬ** *сов. что* тырматыу; **заборони́ть зябь** туңға һөрөлгән ерҙе тырматыу

**ЗАБОРОНОВА́ТЬ** *сов. что см.* **заборони́ть**

**ЗАБО́ТА** *ж* **1.** ҡайғыртыу, хәстәр, ғәм, уй; **хозя́йственные забо́ты** хужалыҡ хәстәрҙәре; **жить без забо́т** ғәмһеҙ йәшәү; **забо́та о бу́дущем** киләсәк хаҡында ҡайғыртыу **2.** (*заботливое отношение*) иғтибар, хәстәрлек; **забо́та о челове́ке** кеше хаҡында хәстәрлек; **прояви́ть забо́ту** хәстәрлек күрһәтеү **3.** *обычно мн.* **забо́ты** мәшәҡәттәр; **дома́шние забо́ты** йорт мәшәҡәттәре ♦ **не моя́ (твоя́, его́ и т.д.) забо́та** минең (һинең, уның) эшем түгел; **не́ было забо́ты** эш юҡта эш булды

**ЗАБО́ТИТЬ** *несов. кого-что* борсоу, тынғыһыҙлау, мәшәҡәтләү; **меня́ забо́тит судьба́ сы́на** мине улымдың яҙмышы борсой

**ЗАБО́ТИТЬСЯ** *несов. о ком-чём* **1.** (*проявлять заботу*) хәстәрлек күреү, хәстәрләү,

ҡайғыртыу; **забо́титься о де́тях** балалар хаҡында ҡайғыртыу; **забо́титься о роди́телях** ата-әсә тураһында хәстәрлек күреү **2.** (*тревожиться, беспокоиться*) борсолоу, ҡайғыртыу, уйлау; **напра́сно не забо́тьтесь** бушҡа борсолмағыҙ

**ЗАБО́ТЛИВО** *нареч.* ҡайғыртыусан, хәстәр менән; **забо́тливо расти́ть молоды́е ка́дры** йәш кадрҙарҙы хәстәр менән үҫтереү

**ЗАБО́ТЛИВОСТЬ** *ж* хәстәрлек, ҡайғыртыусанлыҡ; **прояви́ть забо́тливость** хәстәрлек күрһәтеү

**ЗАБО́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое хәстәрлекле, хәстәрле, ҡайғыртыусан; **забо́тливая мать** хәстәрле әсә; **забо́тливый хозя́ин** хәстәрлекле хужа

**ЗАБОЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ҡурҡыу, ҡурҡып китеү

**ЗАБРАКОВА́ТЬ** *сов. кого-что* яраҡһыҙ тип табыу, яраҡһыҙға (бракка) сығарыу; **забракова́ть това́р** тауарҙы яраҡһыҙға сығарыу

**ЗАБРАКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **забракова́ть**

**ЗАБРА́ЛО** *с*; *ист.* битлек, бит ҡаплағыс (*тимер торҡаның битте һаҡлай торған алғы өлөшө*) ♦ **с откры́тым (по́днятым) забра́лом** асыҡтан-асыҡ, уй-ниәтте йәшермәй

**ЗАБРА́СЫВАНИЕ I** *с см.* **забра́сывать** I; **забра́сывание я́мы землёй** соҡорҙо тупраҡ менән күмеү

**ЗАБРА́СЫВАНИЕ II** *с см.* **забра́сывать** II; **забра́сывание се́ти** ау ташлау

**ЗАБРА́СЫВАТЬ I** *несов. см.* **заброса́ть**

**ЗАБРА́СЫВАТЬ II** *несов. см.* **забро́сить**

**ЗАБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*взять*) алып китеү, (бергә) алыу; **забра́ть кни́ги** китаптарҙы алып китеү **2.** *кого-что*; *разг.* (*отнять, арестовать*) алып китеү, тартып алыу, ҡулға алыу; **забра́ть иму́щество за долги́** бурыс өсөн мөлкәтте тартып алыу; **его́ забра́ли вчера́** уны кисә ҡулға алдылар **3.** *перен., разг.* (*овладеть мыслями, чувствами*) биләп алыу, солғау; **страх забира́ет** ҡурҡыу биләп ала **4.** *что* (*сузить, укоротить*) йыйыу, бөрөү, тарайтыу; **забра́ть в шов** йөйҙө тарайтыу **5.** *без доп.* ситкә китеү (тартыу), алыу; **забра́ть впра́во** уңға тартыу ♦ **забра́ть (себе́) в го́лову** *что* башҡа алған уй-ниәттән ҡайтмаҫҡа ныҡышыу; **забра́ть в ру́ки** үҙенә буйһондороу

**ЗАБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *на что, во что, подо что* (*наверх*) менеү; (*внутрь, под*) инеү; **забра́ться на де́рево** ағасҡа менеү; **забра́ться под одея́ло** юрған аҫтына инеү **2.** (*проникнуть куда-л.*) инеү, үтеү; **забра́ться че́рез окно́** тәҙрәнән инеү; **ко́зы забрали́сь в сад** кәзәләр баҡсаға ингән **3.** (*зайти далеко*) инеп китеү, төпкә инеү; **забра́ться вглубь ле́са** урман төпкөлөнә инеп китеү

**ЗАБРЕДА́ТЬ** *несов. см.* **забрести́**

**ЗАБРЕ́ДИТЬ** *сов.* һаташа башлау, баҫлығыу; **больно́й забре́дил** ауырыу һаташа башланы

**ЗАБРЕ́ЗЖИТЬ** *сов.* яҡтыра башлау, (саҡсаҡ) ялтырап (яҡтырып) күренеү; **забре́зжил рассве́т** таң яҡтыра башланы; **забре́зжил огонёк** ут яҡтырып күренде

**ЗАБРЕСТИ́** *сов.*; *разг.* барып (килеп) сығыу; **забрести́ на огонёк** ут күреп барып сығыу

**ЗАБРИВА́ТЬ** *несов. см.* **забри́ть**

**ЗАБРИ́ТЬ** *сов. кого*; *уст.* һалдатҡа алыу

**ЗАБРОДИ́ТЬ** *сов.* (*о вине, дрожжах и т.п.*) әсеү, әсей башлау

**ЗАБРОНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заброни́ровать 2.** *прил.* бронле, алдан алынған; **заброни́рованное ме́сто** бронле урын

**ЗАБРОНИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **забронирова́ть 2.** *прил.* нығытмалы, бронялы; **забронирóванный блинда́ж** бронялы блиндаж

**ЗАБРОНИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* алдан алып ҡуйыу, бронләү; **заброни́ровать ме́сто в гости́нице** ҡунаҡханала урын бронләү

**ЗАБРОНИРОВА́ТЬ** *сов. что* бронялау, броня менән ҡаплау; **забронирова́ть па́лубу корабля́** карап палубаһын броня менән ҡаплау

**ЗАБРОНИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** броняланыу, броня менән ҡапланыу **2.** *перен., разг.* (үҙеңде) хәүефһеҙләндереү, һаҡланыу сараларын күреү

**ЗАБРОСА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** күмеү, күмеп ташлау; **заброса́ть цвета́ми** сәскә менән күмеп ташлау **2.** күмеп ҡуйыу, күмеү; **заброса́ть я́му землёй** соҡорҙо тупраҡ менән күмеп ҡуйыу **3.** *перен.* яуҙырыу; **заброса́ть докла́дчика вопро́сами** докладсыға һорауҙар яуҙырыу

**ЗАБРО́СИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ырғытыу, ташлау, сөйөп ебәреү; **куда́-то забро́сил ключ и не мо́жет найти́** асҡысын ҡайҙалыр ырғытҡан да таба алмай **2.** *кого-что*; *перен.* олаҡтырыу, ташлау; **судьба́ забро́сила нас далеко́** яҙмыш беҙҙе алыҫҡа олаҡтырҙы **3.** *что* һалыу, аша ташлау; **забро́сить но́гу на́ ногу** аяҡты аяҡҡа һалыу **4.** *кого-что* (*перестать заниматься, заботиться*) ташлау, ташлап ҡуйыу, ҡарамау; **забро́сить му́зыку** музыканы ташлау; **забро́сить хозя́йство** хужалыҡты ташлап ҡуйыу **5.** *что*; *разг.* (*доставить, завезти*) килтереп китеү (ташлау); **забро́сить по пути́** юл ыңғайы килтереп ташлау ♦ **забро́сить у́дочку** ҡармаҡ ташлау (*уй-ниәтен белеп, әләктерергә тырышыу*)

**ЗАБРО́ШЕННОСТЬ** *ж* ташландыҡ хәлдә булғанлыҡ

**ЗАБРО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **забро́сить 2.** *прил.* ташландыҡ, ҡарауһыҙ; **забро́шенный сад** ташландыҡ баҡса

**ЗАБРЫ́ЗГАТЬ I** *сов. кого-что* сәсрәтеү, сәсрәтеп буяу (бысратыу); **забры́згать пла́тье гря́зью** батҡаҡ сәсрәтеп күлдәкте бысратыу

**ЗАБРЫ́ЗГАТЬ II** *сов.* (*начать брызгать*) сәсрәтә (һиптерә, һибәләй) башлау, күҙе төшә башлау; **дождь забры́згал** ямғыр һибәләй башланы

**ЗАБРЫ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **забры́згать** I

**ЗАБУБЁННЫЙ,** -ая, -ое *прост.* тәүәккәл, сая; **забубённый вид** сая ҡиәфәт ♦ **забубённая голова́** үтә сая кеше

**ЗАБУКСОВА́ТЬ** *сов.* буксовать итә башлау; **маши́на забуксова́ла** машина буксовать итә башланы

**ЗАБУЛДЫ́ГА** *м*; *прост.* аҙғын, эскесе, иҫерек баш

**ЗАБУРЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** шаулай башлау; **мо́ре забурли́ло** диңгеҙ шаулай башланы **2.** *перен.* (*о мыслях, чувствах*) ҡайнау, тауышланыу, шаулау, шау-гөр килеү (*халыҡ төркөмө*)

**ЗАБУТИ́ТЬ** *сов. что*; *спец.* бутлау (*цементҡа ваҡ таш ҡатыштырып ныҡытыу*); **забути́ть фунда́мент до́ма** йорт нигеҙен таш тултырып бутлау

**ЗАБУ́ХАТЬ** *сов.*; *разг.* гөрҫ-гөрҫ итеү, гөрһөлдәй башлау; **ору́дия забу́хали** туптар гөрһөлдәй башланы

**ЗАБУХА́ТЬ** *несов. см.* **забу́хнуть**

**ЗАБУ́ХНУТЬ** *сов.* шешенеү, бүртенеү; **дверь забу́хла** ишек шешенгән

**ЗАБУШЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** (*о ветре и т.п.*) ҡотора, (көсәйә) башлау; **ве́тер сно́ва забушева́л** ел йәнә ҡотора башланы **2.** *перен.* ярһып (ташып, ҡабарып) китеү; **в душе́ забушева́ла я́рость** күңелдә асыу ҡабарып китте

**ЗАБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **забы́ть**

**ЗАБЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **забы́ться**; **вы не забыва́йтесь** һеҙ онотолоп китмәгеҙ **2.** (*терять ясность ума*) хәтерһеҙләнеү, онотолоу, иҫте юйыу, онотоусан булыу; **дед от ста́рости стал забыва́ться** ҡартлыҡтан олатай онотола башланы **3.** *страд. от* **забыва́ть**

**ЗАБЫ́ВЧИВОСТЬ** *ж* онотоусанлыҡ, хәтерһеҙлек; **мне ста́ла меша́ть забы́вчивость** мине хәтерһеҙлек йонсота башланы

**ЗАБЫ́ВЧИВЫЙ,** -ая, -ое онотоусан, хәтерһеҙ; **забы́вчивый челове́к** онотоусан кеше

**ЗАБЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **забы́ть**; **забы́тый людьми́** кешеләр тарафынан онотолған **2.** *прил.* онотолған, онотолоп ҡалған; **забы́тые ве́щи** онотолоп ҡалған нәмәләр

**ЗАБЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, о ком-чём* онотоу, иҫтән (хәтерҙән) сығарыу; **забы́ть но́мер телефо́на** телефон номерын онотоу; **забы́ть о про́сьбе** *чьей-л. берәйһенең* үтенесен иҫтән сығарыу; **забы́ть стыд** оятты онотоу **2.** *кого-что* онотоп ҡалдырыу; **забы́ть кни́гу до́ма** китапты өйҙә онотоп ҡалдырыу **3.** *кого-что* (*забросить совсем*) онотоу, онотоп бөтөнләй ташлап ҡуйыу; **забы́ть свои́ обя́занности** үҙ бурысыңды бөтөнләй онотоу ♦ **забы́ть доро́гу** *куда, к кому кемгәлер* (*ҡайҙалыр*) барыуҙан (йөрөүҙән) бөтөнләй туҡтау; **и ду́мать забу́дь** *о ком-чём* уйлама ла, башыңа ла индермә, онот; **себя́ не забы́ть** үҙең тураһында онотмау, үҙ мәнфәғәтеңде иҫтә тотоу; **что́ я (ты, он и т.д.) там (тут) забы́л?** унда миңә (һиңә, уға) ни бар (ҡалған)?

**ЗАБЫТЬЁ** *с* **1.** иҫтән (һуштан) яҙыу, һушһыҙлыҡ; **больно́й впал в забытьё** ауырыу һуштан яҙҙы **2.** (*дремота*) ойоп (йоҡомһорап) китеү **3.** (*глубокая задумчивость*) тәрән уйға бирелеү (сумыу), онотолоу; **мечта́тельное забытьё** хыялый уйға сумыу

**ЗАБЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йоҡомһорау, ойоп китеү, ҡалғыу; **забы́ться на мину́ту** бер минутҡа ойоп китеү **2.** онотолоу, онотолоп тороу, донъяны онотоу; **забы́ться бы надо́лго** оҙаҡҡа онотолоп торһаң ине **3.** (*не сдержать себя*) онотолоу, онотолоп китеү; **не забыва́йтесь, а то наговори́те ли́шнего** онотолоп китмәгеҙ, юғиһә, артығын һөйләп ташларһығыҙ **4.** онотолоу, иҫтән сығыу; **тот слу́чай давно́ забы́лся** ул хәл күптән онотолдо

**ЗАВ** *м*; *разг. см.* **заве́дующий**

**ЗАВ... I** *урыҫ телендәге ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең "мөдир" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **завхо́з** хужалыҡ мөдире

**ЗАВ... II** *урыҫ телендәге ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең "завод" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **завко́м** завод комитеты

**ЗАВА́ЖНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* һауаланып китеү, маһайыу, тәкәбберләнеү

**ЗАВА́Л** *м* **1.** өйөм; **сне́жный зава́л** ҡар өйөмө **2.** *перен., разг.* өйөлөү, өйөлөп тороу, алға бармау; **у меня́ сейча́с с рабо́той зава́л** минең эшем алға бармай

**ЗАВА́ЛИВАНИЕ** *с см.* **завали́ть**

**ЗАВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **завали́ть**

**ЗАВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завали́ться** **2.** *страд. от* **зава́ливать**

**ЗАВА́ЛИНКА** *ж* нигеҙ буйы, ниргә буйы; **сади́ться на зава́линку** нигеҙ буйына ултырыу

**ЗАВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* күмеү, күмеп ҡуйыу; **завали́ть я́му** соҡорҙо күмеп ҡуйыу **2.** *кого-что* баҫыу, күмеп китеү; **завали́ть вход в пеще́ру** мәмерйәнең ауыҙын күмеп китеү **3.** *что* ябыу, ҡаплау; **завали́ть доро́гу брёвнами** юлды бүрәнә менән ҡаплау **4.** *разг.* килтереп тултырыу; **завали́ть магази́н това́рами** магазинға тауар килтереп тултырыу **5.** *кого*; *перен., разг.* өйөп ташлау, күмеү; **завали́ть зака́зами** заказдар менән күмеү **6.** *что*; *разг.* ауҙарыу, ҡолатыу, ҡырын һалыу; **завали́ть теле́гу** арбаны ауҙарыу **7.** *что*; *перен., разг.* (*не справиться с делом и т.п.*) алып барып сығара алмау, килеп сыҡмау, тапшыра алмау, аяҡ салыу; **завали́ть свою́ рабо́ту** эшеңде алып барып сығара алмау; **завали́ть экза́мен** имтиханды тапшыра алмау

**ЗАВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** артына төшөү, төшөп китеү; **кни́га завали́лась за шкаф** китап шкаф артына төшкән **2.** төпкә батыу; **его́ глаза́ завали́лись** уның күҙҙәре төпкә батҡан **3.** *разг.* ҡырынайыу, ҡырын ятыу (ауыу), артҡа ауыу; **маши́на завали́лась на́ бок** машина ҡырын ауған **4.** *разг.* ауыу, ҡолау; **плете́нь завали́лся** ситән ауҙы **5.** *перен., прост.* (*провалиться*) барып сыҡмау, үтәй алмау; **де́ло завали́лось** эш барып сыҡманы **6.** *прост.* (*лечь, улечься*) йоҡларға

ятыу, ауыу, тәгәрәү; **завали́ться в крова́ть** караузтҡа ауыу ♦ **(хоть) завали́сь** *прост.* бик күп, тулып ята

**ЗАВАЛЯ́ТЬ** *сов.*; *прост.* бысратыу, бысраҡҡа буяу

**ЗАВАЛЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ ятыу, ятып ҡалыу, иғтибар ителмәйенсә ятыу; **заявле́ние завался́лось в канцеля́рии** ғариза кәнсәләрҙә оҙаҡ ятҡан

**ЗАВАЛЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее *прост.* оҙаҡ файҙаланылмай (тотонолмай) ятҡан, иҫкергән, кәрәкмәгән; **заваля́щая пила́** оҙаҡ тотонолмай ятҡан бысҡы

**ЗАВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **завари́ть**

**ЗАВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завари́ться 2.** *страд. от* **зава́ривать**

**ЗАВАРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бешереү; **завари́ть чай** сәй бешереү **2.** *тех.* (*путём сварки, заливки*) иретеп (ҡойоп) йәбештереү, ҡаплау **3.** *перен., прост.* тотоноу, ҡуйыртып (башлап) ебәреү; **завари́ть сва́дьбу** туйҙы башлап ебәреү ♦ **завари́ть ка́шу** эште ҡуйыртып (бутап) ебәреү

**ЗАВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бешеү, бешеп сығыу; **чай завари́лся** сәй беште **2.** *перен., разг.* башланыу, ҡуйырып китеү; **де́ло завари́лось** эш ҡуйырып китте

**ЗАВА́РКА** *ж* **1.** *см.* **завари́ть**; **ча́йник для зава́рки ча́я** сәй бешереү сәйнүге **2.** *разг.* бер бешерерлек (һалырлыҡ) сәй; **ча́ю оста́лось на одну́ зава́рку** бер бешерерлек сәй ҡалды

**ЗАВАРНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡайнатып алынған, бешерелгән, ҡайнар һыуға баҫып бешерелгән; **заварно́й хлеб** ҡайнар һыуға баҫып бешерелгән икмәк; **заварно́й корм** ҡайнатып алынған мал аҙығы **2.** ҡайната (бешекләй) торған; **заварно́й котёл** ҡайната торған ҡаҙан

**ЗАВА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое бешерә торған; **зава́рочный ча́йник** сәй бешерә торған сәйнүк

**ЗАВАРУ́ХА** *ж*; *прост.* буталыш, бола

**ЗАВЕДЕ́НИЕ** *с* **1.** (*с определением*) йорт; **вы́сшее учёбное заведе́ние** юғары уҡыу йорто **2.** *уст.* кибет, оҫтахана; **коже́венное заведе́ние** тире эшкәртеү оҫтаханаһы

**ЗАВЕ́ДОВАНИЕ** *с см.* **заве́довать**; **заве́дование шко́лой** мәктәп менән идара итеү

**ЗАВЕ́ДОВАТЬ** *несов. чем* идара итеү, мөдирлек итеү; **заве́довать ка́федрой** кафедра менән мөдирлек итеү; **заве́довать хозя́йством** хужалыҡ менән идара итеү

**ЗАВЕ́ДОМО** *нареч.* күрә (белә) тороп, күрәләтә; **заве́домо ло́жные показа́ния** белә тороп ялған шаһитлыҡ (итеү)

**ЗАВЕ́ДОМЫЙ,** -ая, -ое билдәле, ап-асыҡ күренеп торған; **заве́домая ложь** ап-асыҡ күренеп торған ялған

**ЗАВЕ́ДУЮЩИЙ** *м* и **ЗАВЕ́ДУЮЩАЯ** *ж* мөдир; **заве́дующий фе́рмой** ферма мөдире; **заве́дующая библиоте́кой** китапхана мөдире

**ЗАВЕЗТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* (*по пути, проездом*) индереп сығыу; **завезти́ письмо́** хат индереп сығыу **2.** *кого-что* (*отвезти далеко*) илтеп ҡалдырыу, алып барып ташлау; **завезти́ ко́шку в лес** бесәйҙе урманға илтеп ҡалдырыу **3.** *что, кем*; *разг.* (*доставить*) алып барыу, илтеү, индереү, килтереү; **завезти́ строи́тельные материа́лы** төҙөлөш материалдарын алып барыу

**ЗАВЕРБОВА́ТЬ** *сов. кого-что* вербовкалау, яллау; **завербова́ть на стро́йку** төҙөлөшкә вербовкалау

**ЗАВЕРБОВА́ТЬСЯ** *сов.* вербовкаланыу, ялланыу; **завербова́ться на се́вер** төньяҡҡа вербовкаланыу

**ЗАВЕРБО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **завербова́ть**

**ЗАВЕРБО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завербова́ться 2.** *страд. от* **заверб́овывать**

**ЗАВЕРЕ́НИЕ** *с* ышандырыу, вәғәҙә, тәсдиҡ; **пове́рьте мои́м завере́ниям** минең вәғәҙәмә ышанығыҙ

**ЗАВЕРИ́ТЕЛЬ** *м* раҫлаусы, дөрөҫләүсе, тәсдиҡ итеүсе (ҡылыусы)

**ЗАВЕ́РИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, в чём* или *с союзом "что"* ышандырыу, инандырыу; **заве́рить в свое́й пре́данности** үҙенең бирелгәнлегенә ышандырыу **2.** *что* раҫлау, тәсдиҡ итеү (ҡылыу); **заве́рить по́дпись** ҡултамғаны раҫлау

**ЗАВЕРНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* төрөү, урау; **заверну́ть поку́пки в бума́гу** һатып алған әйберҙәрҙе ҡағыҙға төрөү; **заверну́ть ребёнка в одея́ло** баланы юрғанға урау **2.** *что* ҡайтарыу, төрөү, һыҙғаныу; **заверну́ть рукава́** еңдәрҙе һыҙғаныу **3.** (*свернуть в сторону*) боролоу; **заверну́ть в переу́лок** тыҡрыҡҡа боролоу **4.** *разг.* (*зайти по пути*) инеү, тейеү, һуғылыу; **заверну́ть к дру́гу** дуҫҡа инеү **5.** *что* (*завинтить*) бороп ҡуйыу; **заверну́ть кран** кранды бороп ҡуйыу

**ЗАВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *во что* төрөнөү, ураныу; **заверну́ться в одея́ло** юрғанға ураныу **2.** ҡайтарылыу, төрөлөү; **пола́ пальто́ заверну́лась** пальтоның салғыйы ҡайтарылған **3.** (*завинтиться*) боролоу, ябылыу; **кран заверну́лся** кран боролдо

**ЗАВЕРТЕ́ТЬ I** *сов. кого*; *разг.* **1.** (*захватить всецело*) әйләндереү, өйрөлтөү, (тотош) биләп алыу; **но́вая рабо́та заверте́ла его́** яңы эш уны тотош биләп алды **2.** (*увлечь, вскружить голову*) әүрәтеү, башын әйләндереү

**ЗАВЕРТЕ́ТЬ II** *сов. чем* (*начать вертеть*) әйләндерә (болғай, өйрөлтә) башлау; **соба́ка заверте́ла хвосто́м** эт ҡойроғон болғай башланы

**ЗАВЕРТЕ́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* ҡаңғырыу, буталыу, мәшәҡәтләнеү; **заверте́ться с дела́ми** эштәр менән ҡаңғырыу

**ЗАВЕРТЕ́ТЬСЯ II** *сов.* әйләнә (өйрөлә) башлау; **колесо́ заверте́лось** тәгәрмәс әйләнә башланы

**ЗАВЁРТКА** *ж* **1.** *см.* **завёртывание 2.** *прост.* (*обёртка*) төргәк **3.** *разг.* төрөм (тәмәке); **табаку́ оста́лось на одну́ завёртку** бер төрөм тәмәке ҡалды **4.** *разг.* тығын; **бума́жная завёртка** ҡағыҙ тығын

**ЗАВЁРТОЧНЫЙ,** -ая, -ое төрә (урай) торған; **завёрточная маши́на** төрә торған машина

**ЗАВЁРТЫВАНИЕ** *с см.* **заверну́ть** 1, 2, 5; **завёртывание кра́на** кранды бороу

**ЗАВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **заверну́ть**

**ЗАВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заверну́ться 2.** *страд. от* **завёртывать**

**ЗАВЕРША́ТЬ** *несов. см.* **заверши́ть**

**ЗАВЕРША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заверши́ться 2.** *страд. от* **заверша́ть**

**ЗАВЕРША́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **заверша́ть 2.** *прил.* һуңғы, ахырғы; **заверша́ющий эта́п** һуңғы этап

**ЗАВЕРШЕ́НИЕ** *с см.* **заверши́ть**; **заверше́ние строи́тельства** төҙөлөштө тамамлау ♦ **в заверше́ние всего́** ниҙендер аҙағында, һуңында

**ЗАВЕРШИ́ТЬ** *сов. что* тамамлау, бөтөрөү, ослау; **заверши́ть рабо́ту** эште тамамлау; **заверши́ть диссерта́цию** диссертацияны тамамлау

**ЗАВЕРШИ́ТЬСЯ** *сов.* тамамланыу, тамам булыу, бөтөү, осланыу, теүәлләнеү; **пра́здник заверши́лся пара́дом** байрам парад менән тамамланды

**ЗАВЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **заве́рить**

**ЗАВЕ́СА** *ж* **1.** ҡорған, пәрҙә, шаршау; **тюлевая заве́са** тюль ҡорған **2.** *перен.* пәрҙә, япма; **заве́са тума́на** томан пәрҙәһе; **сне́жная заве́са** ҡар япмаһы ♦ **дымова́я заве́са** төтөн шаршауы (*ниҙелер йәшерең, ҡаплап тороу өсөн яһалған ҡуйы төтөн*); **огнева́я заве́са** ут шаршауы (*дошман атакаһын ҡаплап тотоу өсөн асылған ут яуыны*); **приподня́ть (приоткры́ть) заве́су** асып һалыу, фаш итеү

**ЗАВЕ́СИТЬ** *сов. что* пәрҙә (ҡорған, шаршау) ҡороу; **заве́сить окно́** тәҙрәләргә пәрҙә ҡороу

**ЗАВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* илтеп ташлау, алып килеү (инеү), индереү; **завести́ това́рища к себе́ домо́й** иптәште өйгә алып инеү **2.** *кого*; *разг.* юл ыңғайы индереү, индереп сығыу; **завести́ ребёнка в шко́лу** баланы мәктәпкә индереп сығыу **3.** *кого* ситкә алып китеү, (төпкөлгә) индереү; **завести́ в боло́то** һаҙлыҡҡа индереү **4.** *что* төҙөү, ҡороу, һалыу, булдырыу; **завести́ моло́чное хозя́йство** һөтсөлөк хужалығы булдырыу **5.** *кого-что* (*приобрести*) алыу, булдырыу; **завести́ библиоте́ку** китапхана булдырыу; **завести́ соба́ку** эт алыу (тота башлау) **6.** *что* урынлаштырыу, индереү; **завести́ но́вый поря́док** яңы тәртип урынлаштырыу; **завести́ обыкнове́ние** ғәҙәт итеп индереү **7.** *что* (*начать*) башлау, башлап ебәреү; **завести́ перепи́ску** хат яҙыша башлау; **завести́ разгово́р** һүҙ (хәбәр) башлап ебәреү **8.** *что* хәрәкәткә килтереү, ҡуҙғатып (эшләтеп) ебәреү, йөрөтөү, эшләтеү; **завести́ часы́** сәғәтте эшләтеп ебәреү ♦ **завести́ те́сто** ҡамыр ҡуйыу; **завести́ в тупи́к** ҡомға ултырыу, көрсөккә терәтеү

**ЗАВЕСТИ́СЬ** *сов.* **1.** булыу, барлыҡҡа килеү; күбәйеү, күбәйеп китеү; **у него́ завели́сь друзья́** уның дуҫтары барлыҡҡа килде **2.** урынлашыу, ғәмәлгә инеү; **завели́сь но́вые поря́дки** яңы тәртиптәр урынлашты **3.** хәрәкәткә килеү, эшләп (йөрөп) китеү; **мото́р завёлся** мотор эшләп китте **4.** *перен.*, *разг.* ҡыҙып китеү, тоҡаныу; **он бы́стро заво́дится** ул бик тиҙ ҡыҙып китә

**ЗАВЕ́Т** *м* васыят ♦ **Ве́тхий Заве́т** *см.* **ве́тхий**; **Но́вый Заве́т** Инжил, Евангелие

**ЗАВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡәҙерле, изге; **заве́тное жела́ние** изге теләк **2.** йәшерен, серле; **заве́тное кольцо́** серле балдаҡ

**ЗАВЕ́ТРЕННЫЙ,** -ая, -ое ел теймәгән, елдән ышыҡ (булған); **заве́тренная сторона́** елдән ышыҡ яҡ

**ЗАВЕ́ТРИЕ** *с*; *разг.* ел аҫты, ел теймәгән урын; **стоя́ть в заве́трии** ел теймәгән урында тороу

**ЗАВЕ́ШАТЬ** *сов. что*, *чем* элеп тултырыу (бөтөрөү); **заве́шать сте́ны карти́нами** стенаға картиналар элеп тултырыу

**ЗАВЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **заве́шать**

**ЗАВЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **заве́сить**

**ЗАВЕЩА́НИЕ** *с* **1.** васыятнамә; **соста́вить завеща́ние** васыятнамә төҙөү **2.** васыят; **завеща́ние отцо́в** ата-бабалар васыяты

**ЗАВЕЩА́ТЕЛЬ** *м* васыятнамә яҙыусы

**ЗАВЕЩА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое васыят ...ы; **завеща́тельное письмо́** васыят хаты

**ЗАВЕЩА́ТЬ** *сов.*, *несов.* **1.** *что* (*передать в наследство*) васыят итеү, инселәү; **завеща́ть дом сы́ну** улына йорт васыят итеү **2.** *кому-чему с неопр.* васыят әйтеү

**ЗАВЕ́ЯТЬ I** *сов. что* баҫыу, күмеү; **бура́н заве́ял доро́гу** буран юлды баҫҡан

**ЗАВЕ́ЯТЬ II** *сов.* иҫә (өрә) башлау; **заве́ял ветеро́к** ел иҫә башланы

**ЗАВЗЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (бик) әүәҫ, ныҡ бирелә торған, ысын, ата; **завзя́тый охо́тник** бик әүәҫ һунарсы; **завзя́тый плут** ата алдаҡсы

**ЗАВИВА́НИЕ** *с см.* **завива́ть, завива́ться**

**ЗАВИВА́ТЬ** *несов. см.* **зави́ть**

**ЗАВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зави́ться 2.** *страд. от* **завива́ть**

**ЗАВИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **зави́ть**; **зави́вка воло́с** сәс бөҙрәләтеү **2.** (*причёска*) бөҙрә сәс, бөҙрәләткән сәс; **краси́вая зави́вка** матур бөҙрәләтелгән сәс

**ЗАВИ́ДЕТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* алыҫтан күреү, күреп алыу

**ЗАВИ́ДКИ: зави́дки беру́т** *прост.* көнләшеү, эс ҡыҙыу, эс көтөрләү

**ЗАВИДНЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** алыҫтан күренеү; **завидне́лись заводски́е тру́бы** алыҫтан завод торбалары күренде **2.** *безл.*; *разг.* яҡтырыу, таң атыу

**ЗАВИ́ДНО 1.** *нареч.* көнләшерлек, көнсөллөк тыуҙырырҙай, һоҡланырҙай; **он зави́дно здоро́в** ул көнләшерлек һау **2.** *кому в знач. сказ., безл.* көнләшеү, көнсөллөк килеү; **мне ста́ло зави́дно** минең көнсөллөгөм килде

**ЗАВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое бик яҡшы (һәйбәт), көнләшерлек, һоҡланырлыҡ; **зави́дное здоро́вье** көнләшерлек һаулыҡ

**ЗАВИ́ДОВАТЬ** *несов. кому-чему* көнләшеү, көнсөллөк килеү, ҡыҙығыу; **зави́довать сосе́ду** күршегә көнләшеү

**ЗАВИЗЖА́ТЬ** *сов.* сыйылдап (сырылдап) ебәреү

**ЗАВИЗИ́РОВАТЬ** *сов. что* виза һалыу; **завизи́ровать па́спорт** паспортҡа виза һалыу

**ЗАВИЛЯ́ТЬ** *сов. чем* болғай башлау; **завиля́ть хвосто́м** ҡойроҡ болғай башлау

**ЗАВИНТИ́ТЬ** *сов. что* бороу, бороп ҡуйыу; **завинти́ть га́йки** гайкаларҙы бороп ҡуйыу

**ЗАВИНТИ́ТЬСЯ** *сов.* боролоу, бороп еткерелеү (ҡуйылыу); **га́йка бы́стро завинти́лась** гайка тиҙ боролдо

**ЗАВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **завинти́ть**

**ЗАВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завинти́ться 2.** *страд. от* **зави́нчивать**

**ЗАВИСА́ТЬ** *несов. см.* **зави́снуть**

**ЗАВИ́СЕТЬ** *несов.* **1.** *от кого-чего* буйһоноу, бәйләнгән (буйһонған) булыу, тороу; **ни от кого́ не зави́сеть** бер кемгә лә буйһонмаған булыу **2.** бәйләнешле (бәйле) булыу, бәйләнеү, тороу; **цена́ зави́сит от ка́чества** хаҡ сифатҡа бәйләнгән; **успе́х де́ла зави́сит от тебя́** эштең уңышы һинән тора

**ЗАВИ́СИМОСТЬ** *ж* **1.** бойондороҡ, бойондороҡлолоҡ; **быть в зави́симости** *от кого-л.* бойондороҡта булыу; **крепостна́я зави́симость** крепостной бойондороҡлолоҡ **2.** (*обусловленность*) бәйләнгәнлек, бәйләнгән булыу; **зави́симость от обстоя́тельств** хәлдең торошона бәйләнгәнлек

**ЗАВИ́СИМЫЙ,** -ая, -ое бойондороҡло, буйһонған, бәйле, ирекһеҙ; **зави́симые стра́ны** бойондороҡло илдәр; **зави́симое положе́ние** ирекһеҙ хәл

**ЗАВИ́СНУТЬ** *сов.*; *ав.* аҫылынып тороу, өҫтөндә туҡталып тороу; **вертолёт зави́с над пло́щадью** вертолет майҙан өҫтөндә туҡталып торҙо

**ЗАВИ́СТЛИВО** *нареч.* көнсөллөк менән, көнләшеп; **зави́стливо смотре́ть** көнсөллөк менән ҡарау

**ЗАВИ́СТЛИВОСТЬ** *ж* көнсөллөк, көнләшеүсәнлек; **прояви́ть зави́стливость** көнсөллөк күрһәтеү

**ЗАВИ́СТЛИВЫЙ,** -ая, -ое көнсөл, көнләшеүсән; **зави́стливый челове́к** көнсөл кеше

**ЗАВИ́СТНИК** *м* көнсөл, көнләшеүсе; **у него́ мно́го зави́стников** уның көнләшеүселәре күп

**ЗА́ВИСТЬ** *ж* көнсөллөк; **чу́вство за́висти** көнсөллөк тойғоһо

**ЗАВИТО́Й,** -ая, -ое **1.** бөҙрәләтелгән, бөҙрәләнгән; **завиты́е во́лосы** бөҙрәләнгән сәс **2.** ҡусҡар; **завиты́е рога́** ҡусҡар мөгөҙ

**ЗАВИТО́К** *м* **1.** бөҙрә; **завитки́ воло́с** сәс бөҙрәләре **2.** (*у растений*) мыйыҡ, һабаҡ; **завито́к хме́ля** ҡомалаҡ һабағы **3.** кәкерсәк; **писа́ть с завитка́ми** кәкерсәктәр менән яҙыу

**ЗАВИ́ТЬ** *сов. что* бөҙрәләү; **зави́ть во́лосы** сәс бөҙрәләү

**ЗАВИ́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** бөҙрәләнеү; **во́лосы завили́сь** сәстәр бөҙрәләнгән **2.** (*сделать себе завивку*) бөҙрәләтеү; **зави́ться у парикма́хера** сәсте парикмахерҙа бөҙрәләтеү **3.** йомарланыу, төймәләнеү; **капу́ста завила́сь** кәбеҫтә йомарланған

**ЗАВИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* бөҙрәләнә башлау

**ЗАВИХРЕ́НИЕ** *с*; *спец.* өйрөлтмә; **завихре́ние воды́** һыу өйрөлтмәһе

**ЗАВИ́ХРИТЬСЯ** и **ЗАВИХРИ́ТЬСЯ** *сов.* өйөрөлөү, өйөрөлөп күтәрелеү; **пыль зави́хрилась** саң өйөрөлөп күтәрелде

**ЗАВКО́М** *м* (*заводской комитет*) завком (*завод комитеты*); **заседа́ние завко́ма** завком ултырышы

**ЗАВЛАДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **завладе́ть**

**ЗАВЛАДЕ́ТЬ** *сов. кем-чем* **1.** алыу, ҡулға алыу (төшөрөү), яулап алыу; **завладе́ть кре́постью** ҡәлғәне яулап алыу; **завладе́ть иму́ществом** мөлкәтте ҡулға төшөрөү **2.** *перен.* ҡаратып алыу, тартыу, үҙ яғына ауҙарыу; **завладе́ть внима́нием** иғтибарҙы үҙенә тартыу

**ЗАВЛЕКА́ТЕЛЬНО** *нареч.* ҡыҙыҡ итеп, мауыҡтырып; **завлека́тельно расска́зывать** ҡыҙыҡ итеп һөйләү

**ЗАВЛЕКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс; **завлека́тельная кни́га** ҡыҙыҡлы китап

**ЗАВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **завле́чь**

**ЗАВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завле́чься 2.** *страд. от* **завлека́ть**

**ЗАВЛЕ́ЧЬ** *сов. кого-что* **1.** әүрәтеп, хәйлә менән (көсләп ҡыҙыҡтырып, алдап) алып китеү **2.** *перен.* (*сильно заинтересовать, увлечь*) күңелен биләү, ҡыҙыҡтырыу, мауыҡтырыу; **завле́чь пе́сней** йыр менән күңелен биләү

**ЗАВЛЕ́ЧЬСЯ** *сов.*; *разг.*, *уст.* күңел менән бирелеү, ҡыҙығыу, мауығыу; **завле́чься чте́нием** уҡыу менән мауығыу

**ЗАВО́Д I** *м* завод; **автомоби́льный заво́д** автомобилдәр заводы; **нефтеперего́нный заво́д** нефть ҡыуыу заводы; **рабо́тать на заво́де** заводта эшләү ♦ **ко́нный заво́д** йылҡысылыҡ заводы

**ЗАВО́Д II** *м* **1.** *см.* **завести́** 8; **заво́д стенны́х часо́в** стена сәғәтен ебәреү **2.** (*приспособление в механизме*) борғос; **заво́д испо́рчен** борғос(о)

боҙолған **3.** *полигр.* завод (*китап һ.б. бер йыйыуҙан баҫылған тиражы*); **пе́рвый заво́д** беренсе завод

**ЗАВОДИ́ЛА** *м* и *ж*; *прост.* башлап йөрөүсе, ойоштороусы

**ЗАВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **завести́**

**ЗАВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завести́сь 2.** *страд. от* **заводи́ть**

**ЗАВО́ДКА** *ж*; *разг. см.* **заво́д** II 1, 2

**ЗАВОДНЕ́НИЕ** *с*; *спец. см.* **заводни́ть**; **заводне́ние нефтяны́х пласто́в** нефть ҡатламдарына һыу ебәреү

**ЗАВОДНИ́ТЬ** *сов. что*; *спец.* баҫым менән һыу ебәреү

**ЗАВОДНО́Й,** -ая, -ое **1.** борғосло; **заводна́я игру́шка** борғосло уйынсыҡ **2.** бора торған; **заводно́й ключ** бора торған асҡыс **3.** *прост.* еңел генә ҡуҙғый торған, күңелсәк, уйынсыл

**ЗАВОДНЯ́ТЬ** *несов. см.* **заводни́ть**

**ЗАВОДСКО́Й** и *уст.* **ЗАВО́ДСКИЙ,** -ая, -ое завод ...ы; **заводска́я лаборато́рия** завод лабораторияһы

**ЗАВОДЧА́НЕ** *мн.* (*ед.* **заводча́нин** *м* и **заводча́нка** *ж*); *разг.* завод хеҙмәткәрҙәре (эшселәре)

**ЗАВО́ДЧИК** *м* завод хужаһы, заводсы

**ЗА́ВОДЬ** *ж* ҡолаҡ, ҡултыҡ; **ти́хая за́водь** тын ҡолаҡ

**ЗАВОЕВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **завоева́ть 2.** яулап (һуғышып) алынған ер (ил); **завоева́ния Алекса́ндра Македо́нского** Александр Македонскийҙың яулап алған илдәре **3.** *обычно мн.* **завоева́ния**; *перен.* ҡаҙаныш; **завоева́ния револю́ции** ихтилал ҡаҙаныштары

**ЗАВОЕВА́ТЕЛЬ** *м* яулап (һуғышып) алыусы, буйһондороусы

**ЗАВОЕВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яулап (һуғышып) алыуға йүнәлтелгән; **завоева́тельная поли́тика** яулап алыуға йүнәлтелгән сәйәсәт

**ЗАВОЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* яулап (һуғышып) алыу, буйһондороу; **завоева́ть страну́** илде буйһондороу **2.** *что*; *перен.* ҡаҙаныу, ирешеү, яулап алыу; **завоева́ть дове́рие** ышаныс ҡаҙаныу; **завоева́ть свобо́ду** ирек яулап алыу

**ЗАВОЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **завоева́ть**

**ЗАВО́З** *м* **1.** *см.* **завезти́** 3; **заво́з това́ров в магази́н** магазинға тауар(ҙар) килтереү **2.** (*завезённые товары*) ситтән килтерелгән (алып барылған) тауарҙар

**ЗАВОЗИ́ТЬ I** *несов. см.* **завезти́**

**ЗАВОЗИ́ТЬ II** *сов. что*; *прост.* (*испачкать*) бысратып (буяп) бөтөрөү; **завози́ть брю́ки** салбарҙы бысратып бөтөрөү

**ЗАВОЗИ́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **завози́ть** I

**ЗАВОЗИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *прост.* бысранып (буялып) бөтөү

**ЗАВО́ЗНЫЙ** и **ЗАВОЗНО́Й,** -ая, -ое ситтән килтерелгән (индерелгән); **заво́зный материа́л** ситтән килтерелгән материал

**ЗАВОЛА́КИВАТЬ** *несов. см.* **заволо́чь**

**ЗАВОЛА́КИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заволо́чься 2.** *страд. от* **завола́кивать**

**ЗАВОЛНОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тулҡынлана башлау; **мо́ре заволнова́лось** диңгеҙ тулҡынлана башланы **2.** (*забеспокоиться*) тынысһыҙлана (тулҡынлана, борсола) башлау

**ЗАВОЛО́ЧЬ** *сов. что* ҡаплап (томалап) алыу, ҡаплау, баҫыу; **ту́чи заволокли́ не́бо** болоттар күк йөҙөн ҡаплап алды; **слёзы заволокли́ глаза́** күҙҙе йәш ҡапланы

**ЗАВОЛО́ЧЬСЯ** *сов.* ҡапланыу, томаланыу; **глаза́ заволокли́сь слеза́ми** күҙҙәр йәш менән томаланды

**ЗАВОНЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* һаҫыу, һаҫыҡ тарала башлау

**ЗАВОПИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡысҡыра башлау, һөрәнләп ебәреү

**ЗАВОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **заворожи́ть**

**ЗАВОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **завора́живать**

**ЗАВОРА́ЧИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **заверну́ть 2.** *чем*; *прост.* етәкселек (идара) итеү, эш итеү; **завора́чивать кру́пными су́ммами** күп аҡса менән эш итеү

**ЗАВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заверну́ться 2.** *страд. от* **завора́чивать** 1

**ЗАВОРОЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заворожи́ть 2.** *прил.* (*очарованный*) таң (хайран) ҡалған, һоҡланған; **смотре́ть заворожёнными глаза́ми** таң ҡалып ҡарау

**ЗАВОРОЖИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** сихырлау, арбау; **заворожи́ть взгля́дом** ҡараш менән арбау **2.** *перен.* таң (хайран) ҡалдырыу, арбау; **пе́сня заворожи́ла меня́** йыр мине таң ҡалдырҙы

**ЗАВОРО́Т** *м*; *разг.* **1.** киҫкен тайпылыш; **сде́лать заворо́т** тайпылыш яһау **2.** боролош; **заворо́т реки́** йылға боролошо ♦ **за́ворот кишо́к** эсәк тығылыу (сейәлеү)

**ЗАВОРОШИ́ТЬ** *сов.* ҡуҙғатып ебәреү, әйләндерә башлау

**ЗАВОРОШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* әйләнә (тулғана) башлау

**ЗАВОРЧА́ТЬ** *сов.* һуҡрана башлау

**ЗАВРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шаштырып алдау, алдай-алдай (алдай торғас) буталып китеү; **как бы не завра́ться** алдай торғас, нисек тә буталмаҫҡа (буталып ҡуймаҫҡа) ине

**ЗАВСЕГДА́ТАЙ** *м* һәр ваҡыт булыусы, йыш йөрөүсе; **завсегда́тай теа́тра** театрға һәр ваҡыт йөрөүсе

**ЗА́ВТРА** *нареч.* **1.** иртәгә; **за́втра у́тром** иртәгә иртәнсәк; **за́втра ве́чером** иртәгә кис **2.** *в знач. сущ.* **за́втра** *с нескл.* иртәгә; **откла́дывать на за́втра** иртәгәгә (тиклем) ҡалдырыу ♦ **до за́втра!** иртәгә осрашҡанға тиклем!; **не сего́дня за́втра** бөгөн булмаһа, иртәгә; яҡын арала

**ЗА́ВТРАК** *м* иртәнге аш, иртәнгелек; **на за́втрак** иртәнгелеккә; **пригото́вить за́втрак** иртәнге аш әҙерләү; **взять с собо́й за́втрак** иртәнге ашты үҙең менән алыу ♦ **корми́ть за́втраками** иртәгә булыр тип, алдап йөрөтөү

**ЗА́ВТРАКАТЬ** *несов.* иртәнге аш ашау, иртәнгелекте ашау

**ЗА́ВТРАШНИЙ,** -яя, -ее иртәгәге, иртәгәһе; **за́втрашнее собра́ние** иртәгәге йыйылыш ♦ **за́втрашний день** яҡын киләсәк

**ЗАВУАЛИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **завуали́ровать 2.** *прил.* (*скрытый*) белгертмәй (йәшерен) эшләгән; **в завуали́рованном ви́де** йәшерен хәлдә; **завуали́рованное де́ло** йәшерен эшләнгән эш

**ЗАВУАЛИ́РОВАТЬ** *сов. что* **1.** томалау, ҡаплау **2.** *перен.* йәшереү, томалау; **завуали́ровать и́стину** хәҡиҡәтте йәшереү

**ЗА́ВУЧ** *м* (*заведующий учебной частью*) завуч (*уҡыу-уҡытыу бүлеге мөдире*)

**ЗАВХО́З** *м* (*заведующий хозяйством*) завхоз (*хужалыҡ эштәре мөдире*)

**ЗАВЫВА́НИЕ** *с см.* **завыва́ть**; **завыва́ние ве́тра** ел ыжғырыуы; **завыва́ние волко́в** бүреләр олоуы

**ЗАВЫВА́ТЬ** *несов.* ыжғырыу, олоу; **вью́га завыва́ет** буран ыжғыра

**ЗАВЫ́СИТЬ** *сов. что* арттырыу, саманан тыш күтәреү; **завы́сить тре́бования** талаптарҙы арттырыу; **завы́сить це́ны** хаҡтарҙы саманан тыш күтәреү

**ЗАВЫ́ТЬ** *сов.* ыжғыра (олой) башлау; **ве́тер завы́л** ел ыжғыра башланы

**ЗАВЫША́ТЬ** *несов. см.* **завы́сить**

**ЗАВЫШЕ́НИЕ** *с см.* **завы́сить — завыша́ть**; **завыше́ние цен** хаҡтарҙы күтәреү

**ЗАВЫ́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **завы́сить 2.** *прил.* күтәренке, арттырылған, артыҡ; **завы́шенные но́рмы** арттырылған нормалар

**ЗАВЬЮ́ЖИТЬ** *сов.* **1.** *безл.* буранлай башлау; **ве́чером завью́жило** кис буранлай башланы **2.** *кого-что* өрөп тултырыу, баҫыу, баҫып (күмеп) китеү; **бура́н завью́жил доро́гу** буран юлды баҫҡан

**ЗАВЯЗА́ТЬ I** *сов. что* **1.** бәйләү, төйнәү, төйөнләү, тағыу; **завяза́ть га́лстук** галстук тағыу; **завяза́ть глаза́** күҙ бәйләү; **завяза́ть в у́зел** төйөнләү **2.** *перен.* (*начать отношения*) башлау, керешеү, тотоноу; **завяза́ть дру́жбу** дуҫлаша башлау; **завяза́ть разгово́р** һөйләшеүҙе башлау; **завяза́ть спор** бәхәс башлау **3.** (*дать начало, образовать*) төйөмләнеү, тумалыу (*орлоҡ, емеш*); **завяза́ть плод** емешкә тумалыу **4.** *без доп.*; *прост.* (*покончить с чем-л.*) туҡтау, арыныу

**ЗАВЯЗА́ТЬ II** *несов. см.* **завя́знуть**

**ЗАВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бәйләнеү, төйнәлеү; **га́лстук хорошо́ завяза́лся** галстук яҡшы бәйләнде **2.** *перен.* (*начаться*) башланыу; **завяза́лась бесе́да** әңгәмә башланды; **завяза́лся бой** һуғыш башланды **3.** (*образоваться — о плоде*) (емешкә, орлоҡҡа) төймәләнеү, тумалыу; **сморо́дина завяза́лась** ҡарағат емешкә тумалды

**ЗАВЯ́ЗКА** *ж* **1.** (*тесёмка, ленточка*) бәй, бау, таҫма; **завя́зка хала́та** халат бауы **2.** баш, башланыу; **завя́зка разгово́ра** һөйләшеүҙең башланыуы **3.** *лит.* баш, төйөнләнеү; **завя́зка рома́на** романдың төйөнләнеүе

**ЗАВЯ́ЗНУТЬ** *сов. в чём* **1.** батыу, сумыу; **завя́знуть в боло́те** һаҙға батыу **2.** *перен.*, *разг.* батыу, сумыу, күмелеү; **завя́знуть в дела́х** эшкә күмелеү; **завя́знуть в долга́х** бурысҡа батыу

**ЗАВЯ́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **завя́зывать**, **завя́зываться**

**ЗАВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **завяза́ть** I

**ЗАВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завяза́ться 2.** *страд. от* **завя́зывать**

**ЗА́ВЯЗЬ** *ж*; *бот.* **1.** емшән, инәлек **2.** емешкә (орлоҡҡа) төйнәлеү, тумалыу; **нача́ло за́вязи** емешкә төйнәлә башлау

**ЗАВЯ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **завя́лить**

**ЗАВЯ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **завя́литься 2.** *страд. от* **завя́ливать**

**ЗАВЯ́ЛИТЬ** *сов. что* ҡаҡлау, киптереү; **завя́лить ры́бу** балыҡ ҡаҡлау

**ЗАВЯ́ЛИТЬСЯ** *сов.* ҡаҡланыу, кибеү; **гуся́тина завя́лилась** ҡаҙ ите ҡаҡланған

**ЗАВЯ́НУТЬ** *сов.* **1.** һулыу, быжыу; **цветы́ завя́ли** сәскәләр һулыны **2.** *перен.* һулыу, һулып төшөү, йәмһеҙләнеү; **он завя́л как цвето́к** ул сәскә кеүек һулыны

**ЗАГАДА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* әйтеү, ҡойоу; **загада́ть зага́дку** йомаҡ әйтеү (ҡойоу) **2.** *что* юрау, уй менән самалау; **загада́ть на ка́ртах** кәрт һалып юрау **3.** *разг.* (*предполагать*) алдан уйлап ҡуйыу, фараз итеү; **загада́ть на бу́дущее** киләсәкте алдан уйлап ҡуйыу

**ЗАГА́ДИТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** бысратыу, әшәкеләү; **му́хи зага́дили сте́ны** себендәр стенаны бысратҡан **2.** *перен.* бысратыу, ҡара яғыу, хурлау

**ЗАГА́ДКА** *ж* **1.** йомаҡ, табышмаҡ; **загада́ть зага́дку** йомаҡ ҡойоу; **отгада́ть зага́дку** йомаҡ сисеү (*яуабын табыу*) **2.** *перен.* сер.; **зага́дки приро́ды** тәбиғәт серҙәре ♦ **говори́ть зага́дками** кинәйәләп, ситләтеп һөйләү

**ЗАГА́ДОЧНОСТЬ** *ж* серлелек, билдәһеҙлек, аңлайышһыҙлыҡ; **зага́дочность возбужда́ет интере́с** серлелек ҡыҙыҡһыныу уята

**ЗАГА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое серле, билдәһеҙ, аңлайышһыҙ; **зага́дочная тишина́** серле тынлыҡ; **зага́дочные явле́ния** серле күренештәр

**ЗАГА́ДЫВАНИЕ** *с см.* **зага́дывать**; **зага́дывание зага́док** йомаҡ ҡойоу

**ЗАГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **загада́ть**

**ЗАГА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **зага́дить**

**ЗАГАЗО́ВАННОСТЬ** *ж* газдар менән бысраныу (ағыуланыу); **загазо́ванность во́здуха** һауаның зарарлы газдар менән бысраныуы

**ЗАГАЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое зарарлы газдар менән бысранған (ағыуланған)

**ЗАГА́Р** *м* (ҡояшта тән) ҡарайыу (яныу), янғанлыҡ; **тёмный от зага́ра** ҡояшта янып ҡарайған

**ЗАГАСА́ТЬ** *несов. см.* **зага́снуть**

**ЗАГАСИ́ТЬ** *сов. что* һүндереү; **загаси́ть ла́мпу** шәмде һүндереү

**ЗАГА́СНУТЬ** *сов.*; *разг.* һүнеү, һүнеп ҡуйыу; **свеча́ зага́сла** май шәм һүнде

**ЗАГАТИ́ТЬ** *сов. что* бүрәнә (сыбыҡ) түшәү (*һаҙмат урындан үтеү өсөн*)

**ЗАГА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **загати́ть**

**ЗАГАША́ТЬ** *несов.*; *уст. см.* **загаси́ть**

**ЗАГВО́ЗДКА** *ж*; *разг.* хикмәт, әкәмәт, тотҡарлыҡ; **в э́том вся загво́здка** бар хикмәт тә шунда шул

**ЗАГИ́Б** *м* **1.** бөгөл, бөгөлөш, бөгөлгән урын; **де́лать заги́б** бөгөлөш яһау **2.** *перен.* тайпылыш; **ле́вый заги́б** *полит.* һул тайпылыш

**ЗАГИБА́НИЕ** *с см.* **загиба́ть**, **загиба́ться**; **загиба́ние про́волоки** сымды бөгөү

**ЗАГИБА́ТЬ** *несов. см.* **загну́ть**

**ЗАГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **загну́ться 2.** *страд. от* **загиба́ть**

**ЗАГИПНОТИЗИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* гипнозлау, арбау; **загипнотизи́ровать больно́го** ауырыуҙы гипнозлау

**ЗАГЛА́ВИЕ** *с* исем, баш; **загла́вие кни́ги** китаптың исеме; **под загла́вием** исеме аҫтында

**ЗАГЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое баш, беренсе; **загла́вный лист** беренсе бит ♦ **загла́вная бу́ква** баш хәреф

**ЗАГЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** шымалау, шымартыу, һыпырыу, тигеҙләү, яҙыу, үтекләү; **загла́дить во́лосы руко́й** сәсте ҡул менән һыпырыу; **загла́дить скла́дки пла́тья** күлдәктең бөрмәләрен үтекләү **2.** *перен.* йомшартыу, төҙәтеү, шымалау; **загла́дить вину́** ғәйепте йомшартыу

**ЗАГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* **1.** шымарыу, тигеҙләнеү, үтекләнеү; **неро́вности доро́ги загла́дились** юлдың соҡор-саҡыры тигеҙләнде **2.** *перен.* онотола төшөү, баҫылыу; **оби́да загла́дилась** үпкә онотола төштө

**ЗАГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **загла́дить**

**ЗАГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **загла́диться 2.** *страд. от* **загла́живать**

**ЗАГЛА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **заглота́ть**

**ЗАГЛОТА́ТЬ** *сов. кого-что* йотоу, йотоп ебәреү; **щу́ка заглота́ла пескаря́** суртан ташбашты йотто

**ЗАГЛО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** шымыу, тыныу, шымып (тынып) ҡалыу; **зву́ки загло́хли** тауыштар тынды **2.** *разг.* туҡтау, һүнеү; **мото́р загло́х** мотор һүнде **3.** (*прийти в упадок*) ташландыҡ хәлгә килеү, һүнеп (туҡталып) ҡалыу; **строи́тельство загло́хло** төҙөлөш туҡталып ҡалды; **сад загло́х** баҡса ташландыҡ хәлгә килде **4.** *перен.* (*о чувствах, мыслях*) һүрелеү, һүнеп ҡалыу, онотолоу; **воспомина́ния загло́хли** иҫтәлектәр онотолдо

**ЗАГЛО́ХШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **загло́хнуть 2.** *прил.* (*запущенный*) ташландыҡ; **загло́хший сад** ташландыҡ баҡса

**ЗАГЛУША́ТЬ** *несов. см.* **заглуши́ть**

**ЗАГЛУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** баҫыу, ҡаплау, күмеү; **орке́стр заглуши́л го́лос певца́** оркестр йырсының тауышын күмде (баҫты) **2.** (*смягчить*) йотоу; **ковёр заглуша́ет шум шаго́в** келәм аяҡ тауышын йота **3.** *перен.* баҫыу, баҫылдырыу; **заглуши́ть боль** һыҙлауҙы баҫыу **4.** (*о растениях*) ҡаплау, баҫып алыу; **сорняки́ заглуши́ли всхо́ды** ҡый үләндәре шытымдарҙы баҫып алған **5.** *прост.* томалау, баҫыу, һүндереү; **заглуши́ть самова́р** самауырҙы баҫыу

**ЗАГЛУ́ШКА** *ж*; *разг.* түбәсәй; **прикры́ть самова́р заглу́шкой** самауырҙы түбәсәй менән ҡаплау (баҫыу)

**ЗАГЛЯДЕ́НЬЕ** *с*; *разг.* ҡарап туйғыһыҙ, иҫ киткес, һоҡланғыс (*нәмә*); **конь — загляде́нье** ат — һоҡланғыс

**ЗАГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что* һоҡланып ҡарап тороу, күҙҙе алмай ҡарап тороу (ҡалыу); **загляде́ться на карти́ну** картинаға һоҡланып ҡарап тороу

**ЗАГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **загляну́ть**

**ЗАГЛЯ́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **загляде́ться**

**ЗАГЛЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** күҙ ташлау (һалыу, төшөрөү, йүгертеү), ҡарау, ҡарап алыу; **загляну́ть в окно́** тәҙрәгә ҡарап алыу **2.** *перен.* (*о солнце, луне и т.п.*) ҡарау, төшөү; **со́лнце загляну́ло в ко́мнату** ҡояш бүлмәгә төштө **3.** *разг.* инеп сығыу; **на днях я загляну́ к вам** ошо арала мин һеҙгә инеп сығырмын ♦ **загляну́ть вперёд** киләсәк тураһында уйланыу, киләсәкте күҙаллау, киләсәк менән йәшәү

**ЗАГНА́ИВАТЬ** *несов. см.* **загнои́ть**

**ЗАГНА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **загнои́ться**

**ЗА́ГНАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **загна́ть 2.** *прил.* (*обессиленный*) хәлдән тайған, янған; **за́гнанная ло́шадь** янған ат; **за́гнанный зверь** хәлдән тайған януар **3.** *прил.*; *перен.* (*запуганный, забитый*) ҡағылып-һуғылып баҫылған, ҡурҡытылған, миңрәүләндерелгән ♦ **как за́гнанный зверь** ҡото осҡан; күҙе маңлайына менгән

**ЗАГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуып индереү; **загна́ть скот в сара́й** малды һарайға ҡыуып индереү **2.** *кого* китергә (ҡасырға) мәжбүр итеү; **нужда́ нас туда́ загнала́** беҙҙе унда китергә нужа мәжбүр итте **3.** *кого* (*изнурить быстрой ездой, гоньбой*) ҡыуып арытыу (йөҙәтеү), яндырыу;

**они загна́ли ло́шадь** улар атты яндырҙы **4.** *разг.* ҡағыу, ҡағып индереү; **загна́ть сва́и в зе́млю** свайҙарҙы ергә ҡағып индереү

**ЗАГНИВА́НИЕ** *с см.* **загнива́ть**

**ЗАГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **загни́ть**

**ЗАГНИ́ТЬ** *сов.* **1.** сереү, серей башлау; **капу́ста загнила́** кәбеҫтә серегән **2.** *перен.* сереү, тарҡалыу; **эконо́мика загнила́** иҡтисад тарҡалған

**ЗАГНОИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** серетеү, серетеп бөтөрөү; **загнои́ть фру́кты** емеште серетеү **2.** (*дать загноиться*) эренләтеү, эрен йыйҙырыу; **загнои́ть ра́ну** яраны эренләтеү

**ЗАГНОИ́ТЬСЯ** *сов.* эренләү, эрен йыйыу; **ра́на загнои́лась** яра эренләгән

**ЗАГНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** бөгөү, бөкләп (ҡайтарып) ҡуйыу; **загну́ть рука́в** еңде ҡайтарыу; **загну́ть у́гол страни́цы** биттең мөйөшөн бөкләп ҡуйыу **2.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *прост.* яңылыш әйтеп ташлау (һалыу), тупаҫ һүҙ әйтеү (ысҡындырыу); **ну и загну́л же** әйтеп (әйтте лә) һалды; **загну́ть слове́чко** тупаҫ һүҙ әйтеп ебәреү

**ЗАГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бөгөлөү, бөкләнеү, ҡайтарылыу; **страни́ца загну́лась** бит бөкләнде **2.** *груб.*, *прост.* (*умереть*) дөмөгөү, аяҡ һуҙыу

**ЗАГОВА́РИВАТЬ I** *несов.* һүҙ башлау (ҡушыу), һөйләшергә тырышыу; **загова́ривать с прохо́жим** үтеп барыусыға һүҙ ҡушыу

**ЗАГОВА́РИВАТЬ II** *несов. см.* **заговори́ть** I ♦ **зу́бы загова́ривать** *прост.* икенсе хәбәр һөйләп, һүҙҙе икенсегә бороу; бутау

**ЗАГОВА́РИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **заговори́ться 2.** *разг.* юҡ-бар һөйләү, мәғәнәһеҙ (буталсыҡ) хәбәр һөйләү, һаташыу; **больно́й на́чал загова́риваться** ауырыу һаташа башланы

**ЗАГОВА́РИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **загова́ривать** II

**ЗА́ГОВЕНЬЕ** *с*; *рел.* пост башланырҙан алдағы көн (*христиандарҙа пост алдынан ит-май ашарға мөмкин булған һуңғы көн*)

**ЗА́ГОВОР I** *м* **1.** заговор (*сәйәси маҡсат менән бергә эш итеү өсөн йәшерен һүҙ ҡуйышыу*); **антиправи́тельственный за́говор** хөкүмәткә ҡаршы заговор **2.** (*сговор*) йәшерен һүҙ ҡуйышыу, һүҙ беркетеү

**ЗА́ГОВОР II** *м* (*заклинание*) өшкөрөү доғаһы, им-том, ырым; **лечи́ться за́говором** им-том менән дауаланыу

**ЗАГОВОРИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* күп һөйләп арытыу (ялҡытыу); **он заговори́л всех** ул күп һөйләп барыһын да арытты **2.** *кого-что* (*заколдовать*) өшкөрөү, им-томлау, ырымлау

**ЗАГОВОРИ́ТЬ II** *сов.* **1.** һөйләй башлау; **все заговори́ли ра́зом** барыһы бер юлы һөйләй башланы **2.** һөйләшә башлау; **ребёнок заговори́л** бала һөйләшә башланы **3.** *перен.* (*пробудиться*) уяныу, ҡуҙғалыу; **в нём заговори́ла со́весть** уның намыҫы уянды

**ЗАГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һүҙгә мауығып китеү; **подру́ги заговори́лись** әхирәттәр һүҙгә мауығып китте **2.** *разг.* (*завраться*) артығын һөйләп ташлау, алдаша башлау; **он совсе́м заговори́лся** ул бөтөнләй артығын һөйләп ташланы

**ЗАГОВО́РЩИК** *м* и **ЗАГОВО́РЩИЦА** *ж* заговорсы, заговорҙа ҡатнашыусы

**ЗАГОВО́РЩИЦКИЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **загово́рщический**

**ЗАГОВО́РЩИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** заговорсы(лар) ...ы, заговорсы; **загово́рщический план** заговорсылар планы **2.** (*таинственный*) серле, аҫтыртын; **загово́рщический вид** серле ҡиәфәт

**ЗАГОГОТА́ТЬ** *сов.* **1.** (*о гусях*) ҡаңғылдау, ҡаңғылдаша башлау **2.** *разг.* (*захохотать*) шарҡылдау, шарҡылдап көлөп ебәреү

**ЗА́ГОДЯ** *нареч.*; *разг.* алдан, элегерәк; **за́годя собра́ться в путь** юлға алдан йыйынып ҡуйыу

**ЗАГОЛО́ВОК** *м* исем, баш; **под заголо́вком** исем (баш) аҫтында

**ЗАГОЛО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое баш

**ЗАГОЛОСИ́ТЬ** *сов.*; *прост.* ҡысҡыра (һөрәнләй) башлау

**ЗАГОЛУБЕ́ТЬ** *сов.* **1.** зәңгәрләнеп (күкһелләнеп) ятыу (күренеү, тороу); **вдали́ заголубе́ло мо́ре** алыҫта диңгеҙ күкһелләнеп күренде **2.** (*начать голубеть*) зәңгәрләнә (күкһелләнә) башлау, зәңгәрләнеү, күкһелләнеү

**ЗАГО́Н** *м* **1.** *см.* **загна́ть** 1; **2.** (*место для скота*) ялан кәртә, ҡура, аҙбар, аран; **брeве́нчатый заго́н** бүрәнә аҙбар **3.** загон, бер буй баҫыу ере; **четы́ре заго́на** дүрт буй баҫыу ере ♦ **в заго́не** ситкә ҡағылыу, ҡыйырһытылыу

**ЗАГО́ННЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* загон ...ы; **заго́нная систе́ма испо́льзования па́стбищ** көтөүлектәрҙе файҙаланыуҙың загон системаһы

**ЗАГО́НЩИК** *м* (*на охоте*) әйҙәүсе, мал-тыуарҙы ҡыуыусы

**ЗАГОНЯ́ТЬ I** *несов. см.* **загна́ть**

**ЗАГОНЯ́ТЬ II** *сов. кого*; *разг.* яфалап (интектереп) бөтөү, этләтеү

**ЗАГОНЯ́ТЬ III** *сов.* баҫтыра (ҡыуа) башлау

**ЗАГОРА́ЖИВАНИЕ** *с см.* **загора́живать**

**ЗАГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **загороди́ть**

**ЗАГОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **загороди́ться 2.** *страд. от* **загора́живать**

**ЗАГОРА́НИЕ** *с см.* **загора́ть**

**ЗАГОРА́ТЬ** *несов. см.* **загоре́ть**

**ЗАГОРА́ТЬСЯ** *несов. см.* **загоре́ться**

**ЗАГОРДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* артыҡ ҡупырайыу, маһайыу, тәкәбберләнеп китеү

**ЗАГОРЕВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡайғыра (бошона) башлау

**ЗАГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡояшҡа (көнгә) янған, янып ҡарайған; **загоре́лое лицо́** ҡояшҡа янған бит

**ЗАГОРЕ́ТЬ** *сов.* ҡояшҡа (көнгә) яныу, янып ҡарайыу; **загоре́ть на со́лнце** ҡояшта яныу (ҡыҙыныу)

**ЗАГОРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** янып китеү, яна башлау, тоҡаныу, ҡабыныу; **дрова́ загоре́лись** утын яна башланы; **на не́бе загоре́лась звезда́** күктә йондоҙ ҡабынды **2.** *перен.* (*заблестеть*) ялтырай (яна) башлау, ялтырау, балҡыу; **его́ глаза́ загоре́лись** уның күҙҙәре янып китте **3.** *чем* и *без доп.*; *перен.* теләк уяныу, дәртләнеп (янып) китеү; **загоре́ться жела́нием пое́хать** барыу теләге менән янып китеү **4.** *перен.* (*начаться*) башланыу, ҡыҙып (тоҡанып) китеү; **загоре́лся спор** бәхәс ҡыҙып китте

**ЗАГОРОДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* кәртәләү, ҡамау, кәртәләп (ҡамап) алыу; **загороди́ть двор забо́ром** ишек алдын ҡойма менән кәртәләү **2.** *кого-что* (*заслонить*) ҡаплау, ышыҡлау; **загороди́ть свет** яҡтыны ҡаплау; **загороди́ть собо́й** *кого-что-л.* *кемделер* (*нимәнеләр*) ышыҡлау **3.** *что* (*преградить*) быуыу, кәртәләү; **загороди́ть доро́гу** юлды быуыу **4.** *что*; *разг.* (*загромоздить*) тултырыу; **загороди́ть склад я́щиками** келәтте йәшниктәр менән тултырыу

**ЗАГОРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кәртәләнеү, ҡойма менән уратып алыныу **2.** (*заслониться*) ҡапланыу, ышыҡланыу; **загороди́ться руко́й от со́лнца** ҡояштан ҡул менән ышыҡланыу

**ЗАГОРО́ДКА** *ж*; *разг.* ҡойма, кәртә, ситән; **амба́р с загоро́дкой** ҡойма менән уратылған келәт

**ЗА́ГОРОДНЫЙ,** -ая, -ое ҡала сите, ҡала ситендәге (тышындағы); **за́городный дом** ҡала ситендәге йорт; **за́городная прогу́лка** ҡала ситенә ял сәйәхәте

**ЗАГОРЯЧИ́ТЬСЯ** *сов.* ярһый (ҡыҙа) башлау, ярһып (ҡыҙып) китеү; **конь загорячи́лся** ат ярһып китте

**ЗАГОСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ ҡунаҡ булыу, ҡунаҡта оҙаҡлап китеү; **загости́ться у друзе́й** дуҫтарҙа оҙаҡ ҡунаҡ булыу

**ЗАГОТА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **загото́вить**

**ЗАГОТКОНТО́РА** *ж* (*заготовительная контора*) әҙерләүҙәр конторањы

**ЗАГОТОВИ́ТЕЛЬ** *м* әҙерләүсе, йыйыусы; **рабо́тать заготови́телем ко́жи** тире йыйыусы булып эшләү

**ЗАГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әҙерләү (йыйыу) ...ы; **заготови́тельные це́ны** әҙерләү хаҡтары; **загови́тельный пункт** әҙерләү пункты

**ЗАГОТО́ВИТЬ** *сов. что* әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу; **загото́вить спра́вку** белешмә әҙерләү; **загото́вить дрова́ на́ зиму** ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләү

**ЗАГОТО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **загото́вить**; **загото́вка хле́ба** иген әҙерләү **2.** (*полупродукт*) заготовка, әҙерләмә (*берәй нәмә эшләү өсөн әҙерләнгән материал*); **загото́вка для сапо́г** итеккә әҙерләмә

**ЗАГОТО́ВЩИК** *м* **1.** әҙерләүсе; **загото́вщик овоще́й** йәшелсә әҙерләүсе **2.** заготовка эшләүсе

**ЗАГРАДИ́ТЕЛЬ** *м*; *мор.* заградитель (*ҡамау ҡуйыуҙа файҙаланылған судно*); **ми́нный загради́тель** миналар ҡуйыусы заградитель

**ЗАГРАДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тоҡтарлыҡ итеүсе, ҡаплап тороусы, һаҡлаусы; **загради́тельные сооруже́ния** ҡаплап тороусы нығытмалар ♦ **загради́тельный ого́нь** ҡаршы яҡтың хәрәкәтен туҡтатыу өсөн асылған туп уты

**ЗАГРАДИ́ТЬ** *сов. что* бикләү, быуыу, ҡаплау; **загради́ть путь** юлды бикләү

**ЗАГРАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **загради́ть**

**ЗАГРАЖДЕ́НИЕ** *с* ҡамау, кәртә; **ми́нные загражде́ния** мина кәртәләре (ҡамауы); **ли́ния загражде́ния** ҡамау һыҙығы

**ЗАГРАНИ́ЦА** *ж*; *разг.* сит ил(дәр); **свя́зи с грани́цей** сит илдәр менән бәйләнеш

**ЗАГРАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое сит ил(дәр), сит ил ...ы; **заграни́чные това́ры** сит ил тауарҙары; **заграни́чный па́спорт** сит ил(гә сығыу) паспорты; **заграни́чная пое́здка** сит илгә сәйәхәт

**ЗАГРЕБА́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* йыйыу, өйөү; **загреба́ть се́но** бесән йыйыу **2.** *что*; *перен.*, *прост.* көрәп алыу, һоҫоу; **загреба́ть де́ньги** аҡсаны көрәп алыу **3.** (*грести*) ишеү; **загреба́ть весло́м** ишкәк менән ишеү ♦ **чужи́ми рука́ми жар загреба́ть** кеше көсөн оятһыҙ файҙаланыу

**ЗАГРЕМЕ́ТЬ I** *сов.*; *прост.* **1.** (*упасть с грохотом*) дөп (гөрҫ) итеп тәгәрәү (килеп төшөү); **загреме́ть с ле́стницы** баҫҡыстан гөрҫ итеп килеп төшөү **2.** (*неожиданно оказаться уволенным*) көтмәгәндә эштән бушатылыу (ҡыуылыу)

**ЗАГРЕМЕ́ТЬ II** *сов.* (*начать греметь*) күкрәй (гөрҫөлдәй) башлау, дөбөр-шатыр килә башлау; **загреме́л гром** күк күкрәй башланы

**ЗАГРЕСТИ́** *сов. см.* **загреба́ть**

**ЗАГРИ́ВОК** *м* **1.** (*у лошади*) ял төбө **2.** *прост.* (*у человека*) елкә тамыры

**ЗАГРИМИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* гримлау, грим һалыу (һөртөү); **загримирова́ть лицо́** битте буяу, биткә грим һалыу

**ЗАГРИМИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* гримланыу, грим һалыу (һөртөү); **хорошо́ загримирова́ться** яҡшы итеп грим һалыу

**ЗАГРИМИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **загримирова́ть**

**ЗАГРИМИРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **загримирова́ться** **2.** *страд. от* **загримиро́вывать**

**ЗАГРО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *рел.* әхирәттәге, теге донъялағы; **загро́бная жизнь** теге донъялағы тормош; **загро́бный мир** теге донъя, әхирәт **2.** *разг.* (*о голосе*) бик түбән, тонаҡ (*тауыш*)

**ЗАГРОМОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **загромозди́ть**

**ЗАГРОМОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **загромозди́ть** — **загромożда́ть**; **загроможде́ние ко́мнаты ме́белью** бүлмәне йыһаз менән тултырыу

**ЗАГРОМОЗДИ́ТЬ** *сов. что* өйөп (тултырып) ташлау, тултырып ҡуйыу; **загромозди́ть прохо́д**

**веща́ми** үтеп йөрөгән юлды әйбер менән тултырып ташлау

**ЗАГРОМЫХА́ТЬ** *сов.*; *разг.* дөбөрҙәй башлау, дөбөр-шатыр килеү

**ЗАГРОХОТА́ТЬ** *сов.* гөрһөлдәй (күкрәй) башлау, гөрһөлдәп (күкрәп) ебәреү, шатыр-шотор килеү; **гром загрохота́л** күк күкрәп ебәрҙе

**ЗАГРУБЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡытыршы, ҡаты, ҡатҡан; **загрубе́лые ру́ки** ҡытыршыланып ҡатҡан ҡулдар **2.** *перен.* ҡатыға әйләнгән, ҡаты; **загрубе́лая душа́** ҡаты күңел

**ЗАГРУБЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡатыу, ҡытыршыланыу; **ко́жа загрубе́ла** тире ҡытыршыланды **2.** *перен.* (*очерстветь*) тупаҫланыу, күңеле (бәгере) ҡатыу, ҡаты күңелле булыу; **его́ душа́ загрубе́ла** уның күңеле ҡатҡан

**ЗАГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **загрузи́ть**

**ЗАГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **загрузи́ться** **2.** *страд. от* **загружа́ть**

**ЗАГРУ́ЖЕННОСТЬ** и **ЗАГРУЖЁННОСТЬ** *ж* **1.** тулы (күп) булыу, йөктөң (юлаусыларҙың) күплеге; **загру́женность тра́нспорта** транспортта йөктөң (юлаусыларҙың) күплеге **2.** *перен.* эш күплек, эштең күп булыуы; **загру́женность рабо́той** эштең күп булыуы

**ЗАГРУЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тултырыу (*йөк һ.б. менән*); тулғансы тейәү (һалыу); **загрузи́ть ваго́ны углём** вагондарҙы күмер менән тултырыу **2.** *кого-что*; *перен.* етерлек күләмдә биреү (йөкмәтеү); **загрузи́ть заво́д зака́зами** заводты заказдар менән етерлек күләмдә йөкмәтеү

**ЗАГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йөк алыу (тейәү), тейәнеү; **парохо́д загрузи́лся** пароход йөк тейәне **2.** *перен.*, *разг.* үҙеңә эш алыу, бурыс йөкмәү

**ЗАГРУ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **загрузи́ть** — **загружа́ть**; **загру́зка ба́ржи песко́м** баржаға ҡом тейәү **2.** тәьмин ителеш; **рабо́тать при по́лной загру́зке** тулы тәьмин ителештә эшләү

**ЗАГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое йөк тейәй торған, йөк тейәү ...ы; **загру́зочные маши́ны** йөк тейәү машиналары

**ЗАГРУНТОВА́ТЬ** *сов. что* грунтлау, грунт һалыу, ашлау; **загрунтова́ть холст** киндер туҡымаға грунт һалыу

**ЗАГРУНТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **загрунтова́ть**

**ЗАГРУСТИ́ТЬ** *сов.* күңелһеҙләнә (бошона, моңая, һағышлана) башлау

**ЗАГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **загры́зть**

**ЗАГРЫ́ЗТЬ** *сов. кого* **1.** талап үлтереү, боғаҙлап (йолҡҡолап) ташлау; **во́лки загры́зли овцу́** бүреләр һарыҡты боғаҙлап ташлаған **2.** *перен.*, *разг.* (*замучить, надоесть придирками*) талау, яфалау **3.** *перен.*, *разг.* ғазаплау, ыҙалатыу; **со́весть загры́зла** выждан ғазапланы

**ЗАГРЯЗНЕ́НИЕ** *с см.* **загрязни́ть** — **загрязня́ть**; **загрязне́ние во́здуха** һауаның бысраныуы; **загрязне́ние водоёма промы́шленными отхо́дами** һыу ятҡылығының сәнәғәт ҡалдыҡтары менән бысраныуы

**ЗАГРЯЗНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* бысратыу, керләндереү, ҡарайтыу; **загрязни́ть оде́жду** кейемде бысратыу **2.** *кого*; *перен.* бысратыу, ҡара яғыу

**ЗАГРЯЗНИ́ТЬСЯ** *сов.* бысраныу, керләнеү, ҡарайыу; **окно́ загрязни́лось** тәҙрә бысранған

**ЗАГРЯЗНЯ́ТЬ** *несов. см.* **загрязни́ть**

**ЗАГРЯЗНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **загрязни́ться** **2.** *страд. от* **загрязня́ть**

**ЗАГС** *м* (*отдел записи актов гражданского состояния*) загс (*гражданлыҡ хәле акттарын яҙыу бүлеге*)

**ЗАГУБИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* һәләк итеү, башына етеү; **загуби́ть коня́** атты һәләк итеү **2.** *что* (*истратить напрасно*) юҡ-барға сарыф (әрәм) итеү (туҙҙырыу); **загуби́ть мно́го де́нег** аҡсаны күпләп юҡ-барға сарыф итеү ♦ **загуби́ть жизнь** *чью* тормошон боҙоу (юҡҡа сығарыу); **загуби́ть (свою́) ду́шу** енәйәт менән (гонаһ ҡылып) намыҫына көс килтереү

**ЗАГУДЕ́ТЬ** *сов.* (*о ветре, гудке*) геүләй башлау; (*о самоваре*) шыжлай (шаулай) башлау; (*о пчёлах и т.п.*) гөжләй башлау; **ве́тер загуде́л** ел геүләй башланы

**ЗАГУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **загуля́ть**

**ЗАГУЛЯ́ТЬ** *сов.*; *прост.* эскегә бирелеп китеү, насар юлға баҫыу; **загуля́ть с го́ря** ҡайғынан эскегә бирелеү

**ЗАГУЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* оҙаҡ йөрөү, оҙаҡ йөрөп ташлау; **ма́льчик загуля́лся** малай оҙаҡ йөрөп ташланы **2.** *прост.* типтереү, типтереп йөрөү, эскегә һабышыу; **они́ загуля́лись на сва́дьбе** улар туйҙа типтерҙеләр

**ЗАГУСТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡуйырған; **загусте́лый кисе́ль** ҡуйырған кеҫәл

**ЗАГУСТЕ́ТЬ** *сов.* ҡуйырыу, ҡуйыланыу; **ка́ша загусте́ла** бутҡа ҡуйырҙы

**ЗАГУСТИ́ТЕЛЬ** *м* ҡуйыртҡыс (*матдә*)

**ЗАГУСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* ҡуйыртыу; **загусти́ть кле́йстер** клейстерҙы ҡуйыртыу **2.** *с.-х.* ҡуйыландырыу, йышлау; **загусти́ть посе́вы** сәсеүлектәрҙе йышлатыу

**ЗАД** *м* **1.** (*задняя часть чего-л.*) арт, арт (һан) яҡ; **зад теле́ги** арбаның арты **2.** (*седалище*) ултырыш, оса **3.** *мн.* **зады́**; *прост.* (*задворки*) аҙбар арты, әүен арты, һырт (арт) яҡ; **пройти́ к реке́ зада́ми** йылғаға арт яҡлап үтеү

**ЗАДА́БРИВАНИЕ** *с см.* **зада́бривать**; **зада́бривание сло́вом** һүҙ менән күңелен йомшартыу

**ЗАДА́БРИВАТЬ** *несов. см.* **задо́брить**

**ЗАДАВА́ТЬ** *несов. см.* **зада́ть**

**ЗАДАВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **зада́ться** **2.** *страд. от* **задава́ть**

**ЗАДАВА́ТЬСЯ II** *несов.*; *прост.* маһайып китеү, ҡуҡрайыу, танау сөйөү

**ЗАДАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* баҫып (тапап) үлтереү **2.** *кого*; *прост.* быуып үлтереү, тамаҡлау;

**волк задави́л овцу́** бүре һарыкты тамаҡланы **3.** *что*; *прост.* (*подавить, заглушить*) һүрелдереү, баҫыу, иҙеү, ҡыйырһытыу, еңеү; **задави́ть чу́вства** тойғоларҙы һүрелдереү

**ЗАДАВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* аҫылыныу, быуылып үлеү

**ЗАДА́ВЛЕННОСТЬ** *ж* баҫылыу, ауырайыу; **чу́вствовать зада́вленность** ауырайып тороу

**ЗАДА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **задави́ть 2.** *прил.* ҡыйырһытылған, кәмһетелгән; **зада́вленный челове́к** ҡыйырһытылған кеше

**ЗАДА́НИЕ** *с* эш, задание; **боево́е зада́ние** хәрби эш; **дома́шнее зада́ние** өйгә эш; **дать зада́ние** эш биреү; **получи́ть зада́ние** задание алыу

**ЗА́ДАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **зада́ть 2.** *прил.* билдәле булған, алдан бирелгән, ҡушылған; **сочине́ние на за́данную те́му** бирелгән темаға инша ♦ **за́данная величина́** *мат.* бирелгән дәүмәл

**ЗАДА́РИВАТЬ** *несов. см.* **задари́ть**

**ЗАДАРИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** бүләк менән күмеү, мул итеп бүләкләү **2.** *уст.* (*подкупить подарками*) бүләк биреп һатып алыу, мал биреү, биренеү (*үҙеңә ҡаратыу өсөн*)

**ЗАДА́РОМ** *нареч.*; *прост.* **1.** бушҡа, бушлай, юҡ хаҡҡа, бик арзанға; **рабо́тать зада́ром** бушҡа эшләү **2.** (*бесполезно*) файҙаһыҙға, бушҡа; **прождала́ зада́ром** файҙаһыҙға көттөм

**ЗАДА́ТОК** *м* **1.** задатка; **внести́ зада́ток** задатка индереү **2.** *мн.* **зада́тки** *перен.* һәләт; **зада́тки ума́** аҡыл һәләте

**ЗАДА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*поручить выполнить*) биреү, ҡушыу; **зада́ть рабо́ту** эш биреү; **зада́ть сочине́ние** инша яҙырға ҡушыу **2.** *что* биреү, йүнәлтеү; **зада́ть направле́ние** йүнәлеш биреү **3.** *что*; *разг.* үткәреү, ойоштороу; **зада́ть сва́дьбу** туй үткәреү **4.** *что, чего*; *разг.* (*причинить*) эшләү, яһау, ҡылыу; **зада́ть стра́ху** ҡурҡытыу **5.** *что, чего* (*насыпать, дать*) һалыу, биреү; **зада́ть ло́шади овса́** атҡа һоло һалыу ♦ **зада́ть вопро́с** *кому* һорау биреү; **зада́ть жа́ру (па́ру)** *кому*: 1) ҡыҙҙырыу, әрләү, тетмәһен тетеү; 2) күп эш (бурыс) менән йонсотоу, йәнен алыу; **зада́ть пе́рцу** *кому* ҡыҙҙырыу, кәрәген биреү; **зада́ть стрекача́** ҡасыу, үксәне күтәреү, ҡойроҡто һыртҡа һалыу; **зада́ть тон**: 1) йүнәлеш (тон) биреү; 2) йәм ебәреү; **зада́ть храпака́** иҫ белмәй йоҡлау

**ЗАДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чем* (*поставить задачей*) маҡсат (бурыс) итеп ҡуйыу; **зада́ться це́лью изучи́ть англи́йский язы́к** инглиз телен өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуйыу **2.** *разг.* (*случиться, оказаться*) тура (тап) килеү, барып сығыу; **день сего́дня зада́лся** көнө тура килде бөгөн

**ЗАДА́ЧА** *ж* **1.** бурыс, маҡсат; **лёгкая зада́ча** еңел бурыс; **очередна́я зада́ча** сираттағы бурыс; **ста́вить зада́чей** бурыс итеп ҡуйыу **2.** мәсьәлә; **арифмети́ческая зада́ча** арифметик мәсьәлә; **реши́ть зада́чу** мәсьәләне сығарыу (сисеү)

**ЗАДА́ЧНИК** *м* мәсьәләләр йыйынтығы; **зада́чник по а́лгебре** алгебра буйынса мәсьәләләр йыйынтығы

**ЗАДВИ́ГАТЬ** *сов.* **1.** *что* шыуҙыра (ҡуҙғата) башлау, ҡуҙғатып ебәреү **2.** *чем* ҡуҙғатыу, ҡыбырлатыу; **задви́гать руко́й** ҡулды ҡуҙғатыу

**ЗАДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **задви́нуть**

**ЗАДВИ́ГАТЬСЯ** *сов.* ҡуҙғала (хәрәкәтләнә) башлау, хәрәкәткә килеү

**ЗАДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **задви́нуться 2.** (*быть задвижным*) шыуҙырмалы булыу, шыуҙырып асылыу-ябылыу; **я́щики стола́ задвига́ются** өҫтәл тартмалары шыуҙырыла **3.** *страд. от* **задвига́ть**

**ЗАДВИ́ЖКА** *ж* **1.** бик, келә; **дверна́я задви́жка** ишек келәһе **2.** ябыу, япма; **печна́я задви́жка** мейес ябыуы

**ЗАДВИЖНО́Й,** -ая, -ое шыуҙырмалы; **задвижна́я ра́ма** шыуҙырмалы рам

**ЗАДВИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** шыуҙырыу, шыуҙырып (этәреп, күсереп) ҡуйыу; **задви́нуть в у́гол** мөйөшкә шыуҙырып ҡуйыу; **задви́нуть я́щик стола́** өҫтәл тартмаһын этеп ҡуйыу **2.** шылдырып (тартып, этеп) ҡаплау, ябып ҡуйыу; **задви́нуть за́навес** шаршауҙы ябып ҡуйыу **3.** *разг.* (*запереть чем-л.*) бикләү, бикләп ҡуйыу, бик һалыу; **задви́нуть засо́вами дверь** ишекте келә менән бикләп ҡуйыу

**ЗАДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* эскә инеп китеү, (төпкә үк) инеп ултырыу; **я́щик задви́нулся** тартма эскә инеп китте

**ЗАДВО́РКИ** *только мн.* **1.** аҙбар арты, арт яҡ; **вы́йти на задво́рки** аҙбар артына сығыу **2.** *чего*; *перен.* ҡала (ауыл һ.б.) сите; **жить на задво́рках го́рода** ҡала ситендә йәшәү ♦ **на задво́рках** *чего* ситтә, артҡы планда (булыу), төпкөлдә

**ЗАДЕВА́ТЬ I** *несов. см.* **заде́ть**

**ЗАДЕВА́ТЬ II** *сов. что*; *прост.* юғалтыу, ҡайҙалыр һалыу (ҡуйыу)

**ЗАДЕВА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **задева́ть** I

**ЗАДЕВА́ТЬСЯ II** *сов.*; *прост.* юғалыу, юҡ булыу; **но́жницы куда́-то задева́лись** ҡайсы ҡайҙалыр юғалды

**ЗАДЕ́ЙСТВОВАТЬ I** *сов.* эш (хәрәкәт) итә башлау

**ЗАДЕ́ЙСТВОВАТЬ II** *сов. что* эшкә ебәреү, эшләтә башлау; **заде́йствовать обору́дование** ҡорамалдарҙы эшләтә башлау

**ЗАДЕ́Л** *м*; *разг.* **1.** башлап ҡуйылған (башланған) эш **2.** нигеҙ (*киләсәктә эшләнәсәк эш*); **созда́ть заде́л на бу́дущее** киләсәк эш өсөн нигеҙ булдырыу (һалыу)

**ЗАДЕ́ЛАТЬ** *сов. что* **1.** томалау, бөтәштереү, томалап (ҡаплап) ҡуйыу; **заде́лать ще́ли** тишектәрҙе (ярыҡтарҙы) бөтәштереү **2.** *разг.* (*закупорить*) ҡаҙаҡлау, төрөү, ҡаҙаҡлап (төрөп) ҡуйыу; **заде́лать я́щик** йәшникте ҡаҙаҡлап ҡуй-

ыу ♦ **заде́лать семена́** *с.-х.* орлоҡтарҙы күмеү (*сәскәндә*)

**ЗАДЕ́ЛКА** *ж см.* **заде́лать — заде́лывать**; **заде́лка тре́щин** ярыҡтарҙы бөтәштереү

**ЗАДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **заде́лать**

**ЗАДЁРГАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **задёргать**; **задёрганная хозя́ином ло́шадь** хужаһы йонсотоп бөткән ат **2.** *прил.*; *разг.* йонсоу, йөҙәгән; **задёрганный челове́к** йөҙәгән кеше

**ЗАДЁРГАТЬ I** *сов.* **1.** *кого* йонсотоу, йөҙәтеү, йонсотоп бөтөү; **хозя́ин задёргал ло́шадь** хужа атын йонсотоп бөттө (*дилбегәһен тартҡылай-тартҡылай*) **2.** *перен.*, *разг.* (эш-йомош менән) йонсотоу, йөҙәтеү, интектереп бөтөү; **его́ задёргали** уны интектереп бөттөләр

**ЗАДЁРГАТЬ II** *сов.* **1.** тартҡылай (ҡаҡҡылай) башлау; **задёргать во́жжами** дилбегәне ҡаҡҡылай башлау **2.** *кого-что безл.* тарта (тартыша) башлау; **глаз задёргало** күҙ тарта (тартыша) башланы

**ЗАДЁРГАТЬСЯ** *сов.* тартыша башлау, ҡалтырана башлау; **у него́ задёргались гу́бы** уның ирендәре ҡалтырай башланы

**ЗАДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **задёрнуть**

**ЗАДЁРГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **задёрнуться** **2.** *страд. от* **задёргивать**

**ЗАДЕРЕВЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡатҡан, ойоған; **задеревене́лые па́льцы** ҡатҡан бармаҡтар

**ЗАДЕРЖА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **задержа́ть**; **задержа́ние сне́га** ҡар тотоу; **задержа́ние престу́пника** енәйәтсене тотоу **2.** (*временное нарушение чего-л.*) тотолоу, нимәнеңдер туҡталып тороуы; **задержа́ние мочи́** бәүел тотолоу

**ЗАДЕРЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тотҡарлау, туҡтатып тороу; **задержа́ть по́езд** поезды туҡтатып тороу; **задержа́ть по дела́м** эш менән тотҡарлау **2.** *что* (*отсрочить*) кисектереү, һуңғараҡ ҡалдырыу; **задержа́ть отпра́вку гру́зов** йөктәрҙе ебәреүҙе кисектереү; **дожди́ задержа́ли сев** ямғырҙар сәсеүҙе һуңғараҡ ҡалдырҙы **3.** *что* туҡтатып тороу, туҡтатыу, әкренәйтеү; **задержа́ть дыха́ние** тын алмай тороу **4.** *кого-что* ҡулға алыу, тотоу; **задержа́ть престу́пника** енәйәтсене тотоу **5.** ҡайтармау, бирмәй (оҙаҡ) тотоу; **задержа́ть долг** бурысты ваҡытында ҡайтармау; **задержа́ть журна́л** журналды оҙаҡ тотоу

**ЗАДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** туҡталыу, оҙаҡлау, һуңлау, кисегеү, тотҡарланыу; **разви́тие ребёнка задержа́лось** баланың үҫеше тотҡарланған **2.** (*приостановиться*) өҙөлөп (тотолоп) ҡалыу (тороу), туҡталыу

**ЗАДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **задержа́ть**

**ЗАДЕ́РЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **задержа́ться** **2.** *страд. от* **заде́рживать**

**ЗАДЕ́РЖКА** *ж* **1.** *см.* **задержа́ть** 1—3, 5; **2.** (*промедление, приостановка*) әкренәйтеү, (оҙаҡҡа) һуҙыу, туҡталып тороу, тотҡарлыҡ; **без заде́ржки** тотҡарлыҡһыҙ; **заде́ржка в пути́** юлдағы тотҡарлыҡ

**ЗАДЁРНУТЬ** *сов.* *что* **1.** тартыу, тартып (төшөрөп) ҡуйыу; **задёрнуть за́навес** пәрҙәне төшөрөп ҡуйыу **2.** *перен.* (*закрыть, заволочь*) томалау, ҡаплау, томалап (ҡаплап) алыу (*томән, томан һ.б.*); **не́бо задёрнуто тума́ном** күкте томан ҡаплап алды

**ЗАДЁРНУТЬСЯ** *сов.* **1.** тартылыу, төшөрөлөү, төшөрөп ҡуйылыу; **за́навес задёрнулся** шаршау төшөрөлдө **2.** *перен.* (*закрыться, заволочься*) томаланыу, ҡапланыу; **верши́на задёрнулась о́блаком** тау түбәһе болот менән ҡапланды

**ЗАДЕ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *за что* эләгеү, тейеү, ҡағылыу; **заде́ть за сучо́к** ботаҡҡа эләгеү; **пу́ля заде́ла кость** пуля һөйәккә тейгән **2.** *перен.* ҡағылыу, туҡталыу; **в своём докла́де он заде́л э́тот вопро́с** үҙенең докладында ул был мәсьәләгә ҡағылып үтте **3.** *перен.* (*затронуть, взволновать*) тейеү, ҡағылыу, тәьҫир итеү; **заде́ть самолю́бие** *чьё-л. кемдеңдер* намыҫына тейеү ♦ **заде́ть за живо́е** әрнетеү, ҡанға (яраға) тоҙ һалыу

**ЗАДИ́РА** *м* и *ж*; *разг.* бәйләнсек, сәркәш, һуғыш суҡмары; **быть зади́рой** бәйләнсек булыу

**ЗАДИРА́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **задра́ть** **2.** *кого* (*дразнить*) бәйләнеү, үсектереү, ирештереү

**ЗАДИРА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** *см.* **задра́ться** I; **2.** (*приставать*) бәйләнеү **3.** *страд. от* **задира́ть**

**ЗАДИ́РИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бәйләнсек, эләгешеп барыусан; **зади́ристый хара́ктер** бәйләнсек холоҡ

**ЗАДИЧА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** ҡырағайланыу, сүп-сар баҫыу (*урман, баҡса һ.б. тураһында*); **сад задича́л** баҡса ҡырағайланған **2.** (*отвыкнуть от людей*) ҡырағайланыу, вәхшиләнеү

**ЗАДНЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "артҡы", "арттан" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **задненёбные зву́ки** артҡы аңҡау өндәре; **заднеязы́чные зву́ки** тел арты өндәре

**ЗА́ДНИЙ,** -яя, -ее **1.** артҡы, арттағы; **за́днее колесо́** артҡы тәгәрмәс; **за́дние ряды́** артҡы рәттәр **2.** (*обратный по направлению*) артҡа, кирегә; **за́дний ход** артҡа китеш, кирегә табан хәрәкәт ♦ **за́дняя мысль** йәшерен уй-ниәт; **за́дний прохо́д** *анат.* арт юл; **за́дним умо́м кре́пок** иҫәр аҡылы төштән һуң; **задни́м число́м**: 1) үткән көн менән билдәләү (*хат, документ тураһында*); 2) һуңыраҡ, аҙағыраҡ; **без за́дних ног** иҫ белмәй (йоҡлау); **стоя́ть на за́дних ла́пках** *перед кем* тәрилкә тотоу, ярамһаҡланыу

**ЗА́ДНИК** *м* (*обуви*) үксә; **ту́фли без за́дников** үксәһеҙ туфли

**ЗАДО́БРИТЬ** *сов. кого*; *разг.* (күңелен) йомшартыу, үҙ яғыңа ауҙарыу (*һылап-һыйпап, бүләк биреп*)

**ЗАДО́К** *м* **1.** арт, арҡы өлөш; **задо́к теле́ги** арбаның арты **2.** *см.* **за́дник**

**ЗАДОЛБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* суҡып (үлтерeү) ташлау; **пету́х задолби́л жука́** әтәс ҡуңыҙҙы суҡып ташланы **2.** *что*; *разг.* (*заучить без понимания*) аңламай ятлау; **задолби́ть уро́к** дәрестe аңламай ятлау ♦ **задолби́ть себе́** *что* берәй фекергә йәбешеп ятыу

**ЗАДО́ЛГО** *нареч.* күпкә элек (алда); **встать задо́лго до рассве́та** таң атыуҙан күпкә элек тороу, таң алдынан уҡ тороу

**ЗАДОЛЖА́ТЬ** *сов. кому-чему* и *без доп.*; *разг.* бурысланыу, бурысҡа инеү; **задолжа́ть знако́мым** таныштарға бурысҡа инеү

**ЗАДО́ЛЖЕННОСТЬ** *ж* бурыс, бирәсәк, үтес; **погаси́ть задо́лженность** бурысты түләү

**ЗАДО́ЛЖНИК** *м*; *разг.* бурыслы, бирәсәкле (кеше)

**ЗА́ДОМ** *нареч.* арт менән, артҡа табан; **сиде́ть за́дом** арт менән ултырыу; **пя́титься за́дом** артҡа табан сигеү ♦ **за́дом наперёд** алдын артҡа

**ЗАДО́Р** *м* дәрт, ялҡын; **полеми́ческий задо́р** бәхәс ялҡыны; **берёт задо́р** дәрт уяна; **с задо́ром** дәртләнеп, дәрт менән

**ЗАДО́РИНКА** *ж* **1.** *спец.* шыма (тигеҙ) түгел **2.** дәрт, дәртлелек; **молода́я задо́ринка** йәшлек дәрте ♦ **без сучка́, без задо́ринки**; **ни сучка́, ни задо́ринки** бер тотҡарлыҡһыҙ, шып-шыма

**ЗАДО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** дәртле, күтәренке; **задо́рная пе́сня** дәртле йыр; **задо́рный взгляд** дәртле ҡараш **2.** ҡыҙыу, ярһыу, ҡыҙыу ҡанлы (холоҡло, тәбиғәтле)

**ЗАДО́ХНУТЬСЯ** *сов.*; *прост.* һаҫыу, тонсоғоу

**ЗАДОХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от чего* и *без доп.* тын ҡыҫылыу (ҡурылыу); **задохну́ться от волне́ния** тулҡынланыуҙан тын ҡыҫылыу **2.** тын ҡыҫылып үлеү, сәсәү, тонсоғоу; **пчёлы задохну́лись** бал ҡорттары тонсоҡҡан

**ЗАДРАЗНИ́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* ирештереү, булышыу, үсекләп йөҙәтеү; **ма́льчика задразни́ли** малайҙы үсекләп йөҙәттеләр

**ЗАДРА́ИТЬ** *сов. что*; *мор.* нығытып ябыу, көпләп ҡуйыу; **задра́ить иллюмина́торы** иллюминаторҙарҙы нығытып ябыу

**ЗАДРАПИРОВА́ТЬ** *сов. что* драпировкалау, туҡыма менән көпләү (ҡаплау, бөркәү)

**ЗАДРАПИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **задрапирова́ть**

**ЗАДРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һыҙырыу, ҡуптарыу; **задра́ть кору́** ҡабыҡты һыҙырыу **2.** *что*; *разг.* күтәреү, ҡайтарыу, ҡалҡытыу, саңҡайтыу; **задра́ть го́лову** башты саңҡайтыу; **задра́ть пла́тье** күлдәкте күтәреү **3.** *кого* һыҙырыу, ҡайыҙлау; **задра́ть кнуто́м** сыбыртҡы менән һыҙырыу **4.** *кого* боғаҙлау, тамаҡлау (*йыртҡыс тураһында*); **волк задра́л ягнёнка** бүре бәрәсте боғаҙланы ♦ **задра́ть нос** маһайып китеү, танауҙы күтәреү; **задра́ть хвост** кеше менән иҫәпләшмәй башлау

**ЗАДРА́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* **1.** һыҙырылыу, ҡуптарылыу, ҡубыу; **кора́ задрала́сь** ҡабыҡ ҡупҡан **2.** күтәрелеү, ҡайтарылыу; **ю́бка задрала́сь** итәк күтәрелгән

**ЗАДРА́ТЬСЯ II** *сов.* һуғыша башлау

**ЗАДРЕБЕЗЖА́ТЬ** *сов.* (*о стекле*) сылтырай башлау; (*о голосе*) зыңлай башлау, зыңлап китеү, ҡалтырай башлау

**ЗАДРЕМА́ТЬ** *сов.* ойоу, йоҡомһорау; **ма́лость задрема́л** бер аҙ ойоп алғанмын

**ЗАДРЁМЫВАТЬ** *несов. см.* **задрема́ть**

**ЗАДРОЖА́ТЬ** *сов.* ҡалтырай (дерелдәй) башлау, зыңғырлап һелкенеү; **он внеза́пно задрожа́л** ул ҡапыл ҡалтырай башланы; **стёкла задрожа́ли от гро́ма** күк күкрәүҙән быялалар зыңғырлап һелкенде

**ЗАДУВА́ТЬ I** *несов. см.* **заду́ть** I

**ЗАДУВА́ТЬ II** *несов. см.* **заду́ть** II

**ЗАДУВА́ТЬ III** *несов.* **1.** (*о ветре*) иҫеү, өрөү; **с мо́ря заду́л ве́тер** ел диңгеҙ яғынан иҫә башланы **2.** (*проникать, попадать, дуя, — о ветре*) үтеп инеү, өрөү; **ве́тер задува́ет под шу́бу** ел тун эсенә үтеп инә **3.** *что* өрөп тултырыу; **ве́тер задува́л на черда́к снег** ел ҡыйыҡҡа ҡар өрөп тултырҙы

**ЗАДУ́ВКА** *ж*; *тех. см.* **заду́ть** II; **заду́вка до́мны** домнаны тоҡандырып ебәреү

**ЗАДУ́МАТЬ** *сов. что* **1.** ниәтләү, ниәт итеү, иҫәп тотоу, (ниҙер эшләргә) уйлау; **заду́мать статью́** мәҡәлә (яҙырға) уйлау; **он заду́мал пое́хать в Крым** ул Ҡырымға барырға ниәтләне **2.** (күңелдән) уйлау, иҫкә алып ҡуйыу; **заду́мать число́** *какое-л. берәй* һанды күңелдән уйлау

**ЗАДУ́МАТЬСЯ** *сов.* **1.** *над чем, о чём* и *без доп.* уйланыу, уйға ҡалыу (сумыу); **глубоко́ заду́маться** тәрән уйға ҡалыу; **заду́маться над свое́й судьбо́й** үҙ яҙмышың хаҡында уйланыу **2.** (*заколебаться*) икеләнеү, икеләнеп ҡалыу; **он заду́мался: е́хать или не е́хать** ул барырғамы-юҡмы тип, икеләнеп ҡалды

**ЗАДУ́МЧИВО** *нареч.* уйсан, уйсанланып

**ЗАДУ́МЧИВОСТЬ** *ж* уйсанлыҡ, уйланыу, уйға сумыу (батыу); **впасть в заду́мчивость** уйға сумыу (ҡалыу)

**ЗАДУ́МЧИВЫЙ,** -ая, -ое уйсан; **заду́мчивый взгляд** уйсан ҡараш; **заду́мчивый челове́к** уйсан кеше

**ЗАДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **заду́мать**

**ЗАДУ́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заду́маться** **2.** *страд. от* **заду́мывать**

**ЗАДУРИ́ТЬ I** *сов. кого*; *прост.* алдау, башын бутау ♦ **задури́ть го́лову** *кому* башын әйләндереү (ҡаңғыртыу)

**ЗАДУРИ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* ҡотора (шаша) башлау

**ЗАДУРМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **задурма́нить**

**ЗАДУРМА́НИТЬ** *сов. кого-что* башын әйләндереү, аңын бутау, буталдырыу

**ЗАДУ́ТЬ I** *сов. что* (*потушить*) өрөп һүндереү; **заду́ть свечу́** май шәмде өрөп һүндереү

**ЗАДУ́ТЬ II** *сов. что*; *тех.* тоҡандырыу, эшләтеп ебәреү; **заду́ть до́мну** домнаны тоҡандырыу

**ЗАДУ́ТЬ III** *сов.*; *разг.* (*начать дуть*) өрә (иҫә) башлау, иҫеп (өрөп) ебәреү; **заду́л се́верный ве́тер** төньяҡ еле өрә башланы

**ЗАДУШЕ́ВНО** *нареч.* ихлас, ысын күңелдән; **разгова́ривать задуше́вно** ихлас һөйләшеү

**ЗАКРЕ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **закрепи́ть** 1, 2; **2.** нығыткыс; **закре́пка для лыж** саңғы нығыткысы

**ЗАКРЕПЛЕ́НИЕ** *с см.* **закрепи́ть, закрепи́ться**; **закрепле́ние бе́рега** ярҙы нығытыу; **закрепле́ние успе́хов** уңыштарҙы нығытыу; **закрепле́ние маши́н за зве́ньями** звеноларға машиналар беркетеү

**ЗАКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **закрепи́ть**

**ЗАКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **закрепи́ться** **2.** *страд. от* **закрепля́ть**

**ЗАКРЕПЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **закрепля́ть** **2.** *прил.* нығыта торған, нығыткыс; **закрепля́ющее сре́дство** нығыткыс сара

**ЗАКРЕПОСТИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** крепостной итеү, крепостнойға әйләндереү; **закрепости́ть крестья́н** крәҫтиәндәрҙе крепостной итеү **2.** *перен.* буйһондороу, иркен сикләү

**ЗАКРЕПОСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** крепостнойға әйләнеү **2.** *перен.* буйһоноу, иректе юғалтыу

**ЗАКРЕПОЩА́ТЬ** *несов. см.* **закрепости́ть**

**ЗАКРЕПОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **закрепости́ться** **2.** *страд. от* **закрепоща́ть**

**ЗАКРЕПОЩЕ́НИЕ** *с см.* **закрепости́ть, закрепости́ться**

**ЗАКРИСТАЛЛИЗОВА́ТЬ** *сов. что* кристаллаштырыу, кристалға әүерелдереү (әйләндереү); **закристаллизова́ть раство́р** иретмәне кристаллаштырыу

**ЗАКРИСТАЛЛИЗОВА́ТЬСЯ** *сов.* кристаллашыу, кристалға әүерелеү (әйләнеү); **раство́р закристаллизова́лся** иретмә кристалға әйләнде

**ЗАКРИЧА́ТЬ** *сов.* ҡысҡыра башлау, ҡысҡырып ебәреү; **закрича́ть от бо́ли** ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәреү

**ЗАКРО́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец. см.* **закро́йный**

**ЗАКРОИ́ТЬ** *сов. что*; *спец.* бесеү, киҫеү; **закрои́ть пальто́** пальто бесеү

**ЗАКРО́Й** *м*; *спец. см.* **закрои́ть**

**ЗАКРО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* бесеү ...ы, киҫеү ...ы; **закро́йный цех** бесеү цехы; **закро́йная маши́на** бесеү машинаһы

**ЗАКРО́ЙЩИК** *м* и **ЗАКРО́ЙЩИЦА** *ж* (кейем) бесеүсе; **рабо́тать закро́йщиком** кейем бесеүсе булып эшләү

**ЗА́КРОМ** *м* бура; **ссы́пать хлеб в закрома́** игенде бураға һалыу

**ЗАКРУГЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **закругли́ть, закругли́ться** **2.** (*закруглённая часть чего-л.*) бөгөм, боролма; **закругле́ние доро́ги** юл боролмаһы

**ЗАКРУГЛЁННОСТЬ** *ж* **1.** түңәрәклек, йомролоҡ **2.** *перен.* (*о стиле*) шымалыҡ, йыйнаҡлыҡ

**ЗАКРУГЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **закругли́ть** **2.** *прил.* (*округлый*) түңәрәк, йомро; **закруглённая верши́на горы́** тауҙың йомро түбәһе **3.** *прил.*; *перен.* (*о стиле*) шыма, йыйнаҡ; **закруглённая речь** шыма телмәр

**ЗАКРУГЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** түңәрәкләү, түңәрәк итеү, тумалаҡлау; **закругли́ть у́гол** мөйөштө түңәрәкләү **2.** *перен.* ыҡсымлау, йыйнаҡ итеү; **закругли́ть фра́зу** фразаны ыҡсымлау

**ЗАКРУГЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** түңәрәкләнеү, тумалаҡланыу **2.** *перен.*, *разг.* түңәрәкләү, тамамлау, йомғаҡлау, ослау; **докла́дчик закругли́лся** докладсы һүҙен тамамланы

**ЗАКРУГЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **закругли́ть**

**ЗАКРУГЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **закругли́ться** **2.** *страд. от* **закругля́ть**

**ЗАКРУЖИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** әйләндереү, өйрөлтөп башын әйләндереү; **закружи́ть в та́нце** тансала өйрөлтөү **2.** *перен.*, *разг.* (*увлечь, влюбить в себя*) башын әйләндереү

**ЗАКРУЖИ́ТЬСЯ I** *сов.* әйләнә (өйрөлә) башлау ♦ **голова́ закружи́лась** баш әйләнеү

**ЗАКРУЖИ́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** баш әйләнгәнсе өйрөләү (әйләнеү) **2.** *перен.*, *разг.* ҡаңғырыу, онотолоу; **он совсе́м закружи́лся в хло́потах** ул эш-мәшәҡәттәр менән бөтөнләй онотолдо

**ЗАКРУТИ́ТЬ I** *сов. что* (*крутя, завинтить, завить что-л.*) бороп (урап) ҡуйыу, урау, бороу; **закрути́ть про́волоку** сымды урап ҡуйыу; **закрути́ть усы́** мыйыҡ бороу **2.** *что* (*туго стянуть*) шаҡарып (ҡайырып) бәйләү; **закрути́ть ру́ки** ҡулды шаҡарып бәйләү **3.** *с кем*; *прост.* ғишыҡҡа бирелеү ♦ **закрути́ть га́йки** гайканы бороп ҡуйыу

**ЗАКРУТИ́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* бора башлау, әйләндереү, өйрөлтөү, әйләндереп (өйрөлтөп) ебәреү; **закрути́ть колесо́** тәгәрмәсте өйрөлтөп ебәреү

**ЗАКРУТИ́ТЬСЯ I** **1.** *сов.* (*крутясь, свернуться*) уралыу; **верёвка закрути́лась** бау уралды **2.** *прост.* (*завинтиться*) бороп индерелеү; **винт закрути́лся** винт бороп индерелде

**ЗАКРУТИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* өйрөлә (әйләнә) башлау, өйрөлөп (әйләнеп) китеү; **наконе́ц колесо́ закружи́лось** тәгәрмәс әйләнә лә башланы

**ЗАКРУ́ТКА** *ж* **1.** *см.* **закрути́ть** I, **закрути́ться** I; **2.** борғос; **закру́тка для болта́** болт(ты) борғос **3.** *прост.* тәмәке төрөмө **4.** *спец.* (*способ заделки края ткани*) ҡайма

**ЗАКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **закрути́ть** I

**ЗАКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **закрути́ться** I; **2.** *страд. от* **закру́чивать**

**ЗАКРЫВА́НИЕ** *с см.* **закрыва́ть, закрываться**

**ЗАКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **закры́ть**

**ЗАКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **закры́ться** **2.** *страд. от* **закрыва́ть**

**ЗАКРЫ́ТИЕ** *с см.* **закры́ть**; **закры́тие магази́на** магазиндың ябылыуы; **закры́тие театра́льного сезо́на** театр сезонының ябылыуы

**ЗАКРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **закры́ть** **2.** *прил.* (*крытый*) ябыулы, ҡаплаулы, өҫтө ябыҡ, өҫтән ҡаплаулы; **закры́тая маши́на** өҫтө ябыҡ машина **3.** *прил.* (*доступный не для всех*)

ябыҡ; **закры́тый ко́нкурс** ябыҡ конкурс; **закры́тое собра́ние** ябыҡ йыйылыш **4.** *прил.*; *мед.* күренеп тормаған, эстән булған; **закры́тый перело́м** эстән һынған (һөйәк) **5.** *прил.* (иҙеүе) ябыҡ; **закры́тое пла́тье** ябыҡ иҙеүле күлдәк ♦ **закры́тое голосова́ние** йәшерен тауыш биреү; **закры́тое мо́ре** эске диңгеҙ (*океандар менән тоташмаған*); **в закры́том помеще́нии** өй эсендә; **закры́тое письмо́**: 1) ябыҡ хат (*конверт эсендәге*); 2) билдәле кешеләр өсөн хат; **при закры́тых дверя́х** үҙ кешеләре (рәсми кешеләр) менән генә (*кәңәшмә, һөйләшеү һ.б.*); **с закры́тыми глаза́ми** уйлап-нитеп тормай, күҙҙе йомоп, тәүәккәлләп

**ЗАКРЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ябыу, ябып ҡуйыу; **закры́ть окно́** тәҙрәне ябыу **2.** *кого-что* ҡаплау, ышыҡлау, томалау; **закры́ть лицо́ руко́й** битте ҡул менән ҡаплау; **ту́чи закры́ли не́бо** болоттар күк йөҙөн томаланы **3.** *что* йомоу; **закры́ть глаза́** күҙҙе йомоу **4.** *что* бикләү, бикләп ҡуйыу; **закры́ть чемода́н** сумаҙанды бикләп ҡуйыу **5.** *что* ябыу, туҡтатыу; **закры́ть журна́л** журналды (сығыуҙан) туҡтатыу; **закры́ть собра́ние** йыйылышты ябыу **6.** *что* (*прекратить подачу*) ябыу, туҡтатыу; **закры́ть во́ду** һыуҙы ябыу ♦ **закры́ть глаза́** *кому* күҙен йомдороу (*йән биргән кеше янында булыу*); **закры́ть глаза́ на** *что* күҙ йомоп ҡарау, күрмәмеш булыу; **закры́ть две́ри до́ма** *перед кем, для кого* берәйһен йортонда ҡабул итмәй башлау, аяғын баҫтырмау; **закры́ть рот** *кому* ауыҙын ябыу (ҡаплау)

**ЗАКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ябылыу, бикләнеү; **сейф закры́лся** сейф бикләнде; **дверь закры́лась** ишек ябылды **2.** ҡапланыу, томаланыу; **не́бо закры́лось облака́ми** күк йөҙө болоттар менән ҡапланды **3.** (*сомкнуться*) йомолоу; **глаза́ закры́лись** күҙҙәр йомолдо **4.** (*перестать существовать*) туҡталыу, ябылыу, сыҡмай башлау; **вы́ставка закры́лась** күргәҙмә ябылды; **журна́л закры́лся** журнал сығыуҙан туҡталды **5.** (*о ране*) бөтәшеү, уңалыу, төҙәлеү; **ра́на закры́лась** яра уңалды

**ЗАКУЛИ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәхнә артындағы (артында булған); **закули́сное простра́нство** сәхнә артындағы аралыҡ **2.** *перен.* йәшерен, аҫтыртын; **закули́сные дела́** аҫтыртын эштәр; **закули́сные перегово́ры** йәшерен һөйләшеүҙәр

**ЗАКУПА́ТЬ** *несов. см.* **закупи́ть**

**ЗАКУПА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ һыу инеү

**ЗАКУПИ́ТЬ** *сов. что, чего* күпләп һатып алыу, алдан һатып алып ҡуйыу (бөтөү); **закупи́ть проду́кты** аҙыҡ-түлекте күпләп һатып алып ҡуйыу

**ЗАКУ́ПКА** *ж см.* **закупи́ть — закупа́ть**; **заку́пка ору́жия** ҡоралды күпләп һатып алыу

**ЗАКУ́ПОРИВАТЬ** *несов. см.* **заку́порить**

**ЗАКУ́ПОРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заку́пориться 2.** *страд. от* **заку́поривать**

**ЗАКУ́ПОРИТЬ** *сов. что* **1.** тығынлау, тығын ҡуйыу (тығыу); **заку́порить буты́лку** шешәне тығынлау **2.** *перен.* бикләп (ябып) ҡуйыу, бикләү, ябыу; **заку́порить прохо́д** йөрөр ерҙе бикләү

**ЗАКУ́ПОРИТЬСЯ** *сов.* **1.** тығынланыу, тығылыу, томаланыу; **буты́лка заку́порилась** шешә тығылды; **кровено́сные сосу́ды заку́порились** ҡан тамырҙары тығылды **2.** *перен.*, *разг.* бикләнеү; **заку́пориться в ко́мнате** бүлмәгә бикләнеү

**ЗАКУ́ПОРКА** *ж см.* **заку́порить**, **заку́пориться**; **заку́порка буты́лок** шешәләрҙе тығынлау; **заку́порка вен** вена (ҡара ҡан) тамырының тығылыуы

**ЗАКУ́ПОЧНЫЙ,** -ая, -ое һатып алыу ...ы; **заку́почная цена́** һатып алыу хаҡы

**ЗАКУ́ПЩИК** *м* и **ЗАКУ́ПЩИЦА** *ж* һатып алыусы; **заку́пщик сырья́** сеймал һатып алыусы

**ЗАКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **закури́ть**

**ЗАКУ́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **закури́ться 2.** *страд. от* **заку́ривать**

**ЗАКУРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*начать курить*) тоҡандырыу (*тәмәке*); **закури́ть тру́бку** төрөпкәне тоҡандырыу **2.** (*стать курильщиком*) тарта башлау

**ЗАКУРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тоҡаныу, ҡабыныу, яна башлау; **сигаре́та закури́лась** сигарет тоҡанды **2.** (*задымиться*) көйрәү, төтәп китеү; **ба́ня закури́лась** мунса төтәй башланы

**ЗАКУСИ́ТЬ I** *сов.* тешләү; **закуси́ть губу́** ирен тешләү ♦ **закуси́ть удила́**: 1) (*о лошади*) баш бирмәү, алып ҡасыу; 2) (*выйти из повиновения*) ҡыҙып (туҙып) китеү, тыйыла (белмәү) алмау, теҙгендән (бәйҙән) ысҡыныу

**ЗАКУСИ́ТЬ II** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* (*поесть немного, наскоро*) ҡапҡылап алыу, тамаҡ ялғау; **пора́ закуси́ть** ҡапҡылап алырға ваҡыт **2.** *что, чем* артынан ҡабып ебәреү; **закуси́ть лека́рство конфе́той** дарыу артынан кәнфит ҡабып ебәреү

**ЗАКУ́СКА** *ж* **1.** *см.* **закуси́ть** II; **2.** закуска, еңел ашамлыҡ; **холо́дные заку́ски** һалҡын закускалар

**ЗАКУ́СОЧНАЯ** *ж* закусочный, тәғәмхана

**ЗАКУ́СЫВАТЬ I** *несов. см.* **закуси́ть** I

**ЗАКУ́СЫВАТЬ II** *несов. см.* **закуси́ть** II

**ЗАКУ́ТАТЬ** *сов. кого-что* төрөү, урау; **заку́тать в одея́ло** одеялға урау

**ЗАКУ́ТАТЬСЯ** *сов.* төрөнөү, ураныу; **заку́таться в шу́бу** тунға төрөнөү; **заку́таться ша́лью** шәл менән ураныу

**ЗАКУТИ́ТЬ** *сов.* эскегә һабышып китеү, типтерә башлау, юлдан яҙып китеү

**ЗАКУТО́К** и **ЗАКУ́ТОК** *м*; *разг.*, *пренебр.* ҡараңғы мөйөш, ҡыҫыҡ бүлмә

**ЗАКУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **заку́тать**



12 зак. 2.0084.05

**ЗАКУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заку́таться 2.** *страд. от* **заку́тывать**

**ЗАЛ** *м* зал; **а́ктовый зал** актовый зал; **зри́тельный зал** тамаша залы; **чита́льный зал** уҡыу залы; **зал заседа́ний** ултырыштар залы; **зал ожида́ния** көтөү залы

**ЗА́ЛА** *ж*; *уст. см.* **зал**

**ЗАЛА́ДИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* и *без доп.* ҡат-ҡат әйтеү, (бер үк нәмәне) ҡабатлау (туҡыу, тылҡыу); **что ты зала́дил?** һин нимә бер үк нәмәне туҡыйһың? **2.** *с неопр.* (*начать делать что-л. упорно*) ныҡлап керешеү, башлап алып китеү; **зала́дил дождь** ямғыр ныҡлап яуырға кереште

**ЗАЛА́ДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* рәтләнеү, көйләнеү, рәтләнеп (көйләнеп) китеү; **де́ло зала́дилось** эш рәтләнеп китте

**ЗАЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **заломи́ть** I

**ЗАЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **зала́мывать**

**ЗАЛАСКА́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* (артыҡ) иркәләп ташлау; **заласка́ть ребёнка** баланы артыҡ иркәләп ташлау

**ЗАЛАТА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* ямап ҡуйыу, ямау һалыу; **залата́ть брю́ки** салбарға ямау һалыу

**ЗАЛА́ЯТЬ** *сов.* өрә башлау, өрөргә тотоноу; **соба́ка зала́яла** эт өрә башланы

**ЗАЛЕГА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **залега́ть 2.** *геол.* ятҡылыҡ, ятыш, ятыу; **залега́ние го́рных поро́д** тау тоҡомдарының ятыуы; **залега́ние ка́менного угля́** таш күмер ятышы

**ЗАЛЕГА́ТЬ** *несов. см.* **зале́чь**

**ЗАЛЕДЕНЕВА́ТЬ** *несов. см.* **заледене́ть**

**ЗАЛЕДЕНЕ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **заледене́ть 2.** *прил.* боҙланған, боҙ менән ҡапланған; **заледене́вшие усы́** боҙланған мыйыҡтар

**ЗАЛЕДЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** боҙланған, боҙ ҡаплаған, боҙло; **заледене́лое окно́** боҙ ҡаплаған тәҙрә **2.** (*холодный*) һалҡын, боҙ кеүек, туңып бөткән; **заледене́лые ру́ки** боҙ кеүек ҡулдар

**ЗАЛЕДЕНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** туңыу, боҙланыу, боҙ менән ҡапланыу; **еда́ заледене́ла** ризыҡ туңған; **окно́ заледене́ло** тәҙрә туңған **2.** (*замёрзнуть*) туңып ҡатыу; **па́льцы заледене́ли** бармаҡтар туңып ҡатты

**ЗАЛЕДЕНИ́ТЬ** *сов. что* туңдырыу, ҡатырыу

**ЗАЛЕЖА́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* оҙаҡ ятҡан, ятып ҡабыҡҡан, күгәргән; **залежа́лый това́р** оҙаҡ ятҡан тауар

**ЗАЛЕЖА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** оҙаҡ ятыу; **това́р залежа́лся на скла́де** тауар складта оҙаҡ ятҡан **2.** (*испортиться от долгого хранения*) ятып боҙолоу, бурһыу, күгәреү; **мука́ залежа́лась** он күгәргән

**ЗАЛЁЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **залежа́ться**

**ЗА́ЛЕЖНЫЙ,** -ая, -ое ҡалдау; **за́лежные зе́мли** ҡалдау ерҙәр

**ЗА́ЛЕЖЬ** *ж* **1.** ятыш, ятҡылыҡ; **за́лежи ка́менного угля́** таш күмер ятҡылығы **2.** *мн.* **за́лежи** өйөм; **за́лежи сне́га** ҡар өйөмдәре **3.** ҡалдау ер, һөрөлмәй ятҡан баҫыу; **оставля́ть под за́лежь** ҡалдау ер итеп ҡалдырыу

**ЗАЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **зале́зть**

**ЗАЛЕ́ЗТЬ** *сов.* **1.** *на что* менеп китеү; **зале́зть на кры́шу** ҡыйыҡҡа менеп китеү **2.** (*проникнуть, забраться*) инеү; **зале́зть под стол** өҫтәл аҫтына инеү; **зале́зть в кусты́** ҡыуаҡ араһына инеү **3.** (*проникнуть тайком*) төшөү; **во́ры зале́зли в дом** бурҙар өйгә төшкән; **зале́зть в карма́н** кеҫәгә төшөү ♦ **зале́зть в долги́** (**в долг**) бурысҡа батыу; **зале́зть в ду́шу** *кому*: 1) ышаныс яулау; 2) күңелгә инеү

**ЗАЛЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ялҡауланыу; **залени́ться идти́ на охо́ту** һунарға барырға ялҡауланыу

**ЗАЛЕПЕТА́ТЬ** *сов.* бытылдай (бытырлай) башлау

**ЗАЛЕПИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һылап ҡуйыу; **залепи́ть щель гли́ной** ярыҡты балсыҡ менән һылап ҡуйыу **2.** (*заклеить*) йәбештереп ҡуйыу; **залепи́ть окно́ бума́гой** тәҙрәне ҡағыҙ менән йәбештереп ҡуйыу **3.** (*облепить поверхность чего-л.*) һылашыу, йәбешеү; **снег залепи́л лицо́** ҡар биткә һылашты **4.** *без доп.*; *прост.* сәпәү, тондороу; **залепи́ть пощёчину** яңаҡҡа сәпәү

**ЗАЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **залепи́ть**

**ЗАЛЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое урман артында(ғы), араһында(ғы)

**ЗАЛЕ́СЬЕ** *с* урман арты

**ЗАЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **залете́ть**

**ЗАЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** осоп инеү, осоп килеп инеү; **в окно́ залете́ла ба́бочка** тәҙрәнән күбәләк осоп инде **2.** (осоп) барып сығыу, бейеккә осоу; **самолёт залете́л за ту́чи** самолёт болоттарҙан бейеккә осто **3.** (осоп барышлай) төшөп (туҡтап) китеү, һуғылыу; **залете́ть за горю́чим** яғыулыҡ алырға һуғылыу

**ЗАЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (осраҡлы) осоп килгән (төшкән); **залётная пти́ца** осоп төшкән ҡош **2.** *перен.*, *разг.* (осраҡлы) килеп сыҡҡан, юл ыңғай килеп ингән; **залётный путеше́ственник** осраҡлы килеп сыҡҡан сәйәхәтсе **3.** *трад.-поэт.* ҡыйыу, сапсан, сая; **залётная тро́йка** сапсан тройка

**ЗАЛЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **залечи́ть**

**ЗАЛЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **залечи́ться 2.** *страд. от* **зале́чивать**

**ЗАЛЕЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* дауалап төҙәтеү, уңалдырыу; **залечи́ть ра́ну** яраны (йәрәхәтте) уңалдырыу **2.** *кого*; *разг.* (*измучить лечением*) дарыулап йөҙәтеү, дауалап йонсотоп бөтөү

**ЗАЛЕЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** дауаланып төҙәлеү, уңалыу; **ра́на залечи́лась** яра уңалды **2.** *разг.* дауаланыу менән артыҡ мауығыу

**ЗАЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** (*лечь надолго*) оҙаҡҡа (ныҡлап) ятыу; **зале́чь спать** ныҡлап йоҡларға ятыу **2.** йәшенеп (боҫоп) ятыу; **зале́чь за ка́мнем** таш артына боҫоп ятыу **3.** урынлашыу, ятыу; **го́род залёг в низи́не** ҡала уйһыулыҡта урынлашҡан **4.** *геол.* ятыу; **зо́лото залегло́ неглубоко́** алтын тәрәндә ятмаған **5.** ятыу, һалыныу; **морщи́ны залегли́ на его́ лбу** уның маңлайына һырҙар ятҡан **6.** *перен.* (*глубоко запасть*) күңелгә инеп ултырыу (һеңеү), йөрәккә үтеү; **не́нависть к враға́м залегла́ глубоко́** дошманға нәфрәт күңелгә ныҡ һеңгән

**ЗАЛИ́В I** *м*; *геогр.* ҡултыҡ; **зали́в мо́ря** диңгеҙ ҡултығы

**ЗАЛИ́В II** *м*; *охот.* (ярһыу) сәңкелдәк тауыш; **соба́чий лай с зали́вом** эттәрҙең ярһып сәңкелдәк тауыш менән өрөүе

**ЗАЛИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **зали́ть 2.** *прост.* шапыртыу, алдау; **хва́тит залива́ть** алдау етер, етте алдау

**ЗАЛИВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **зали́ться** I; **2.** *страд. от* **залива́ть** 1

**ЗАЛИВА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **зали́ться** II

**ЗАЛИ́ВИСТЫЙ,** -ая, -ое ярһыу, сәңкелдәк; **зали́вистый лай** сәңкелдәк өрөү

**ЗАЛИ́ВКА** *ж* *см.* **зали́ть** 5—7

**ЗАЛИВНО́Е** *с* ҡойҡа, тертелдәк; **заливно́е из судака́** һыланан эшләнгән тертелдәк

**ЗАЛИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** һыубаҫар, һыу баҫа торған; **заливно́й луг** һыубаҫар болон **2.** ҡойҡалы, ҡойҡа менән әҙерләнгән; **заливна́я ры́ба** ҡойҡа менән әҙерләнгән балыҡ

**ЗАЛИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡоя торған; **зали́вочная фо́рма** ҡоя торған ҡалып

**ЗАЛИЗА́ТЬ** *сов. что* **1.** ялап алыу (бөтөрөү); **зализа́ть ра́ну** яраны ялап бөтөрөү **2.** *разг.* (*пригладить*) ялап ҡуйыу, ялағандай итеү; **зализа́ть во́лосы** сәсте ялағандай итеү **3.** *перен.* ялтыратып ҡуйыу

**ЗАЛИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **зализа́ть**

**ЗАЛИПА́ТЬ** *несов. см.* **зали́пнуть**

**ЗАЛИ́ПНУТЬ** *сов.*; *разг.* йәбешеү

**ЗАЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һыу баҫыу (сығыу); **полово́дье зали́ло луга́** ташҡын болондарҙы баҫты **2.** (*облить*) түгеү, буяу; **зали́ть стол черни́лами** өҫтәлгә ҡара түгеү; **лицо́ за́лито кро́вью** бите ҡанға буялған **3.** *перен.* тултырыу, ҡаплап (сорнап, биләп) алыу; **ко́мната залита́ све́том** бүлмәне яҡтылыҡ сорнап алған; **кра́ска залила́ его́ лицо́** йөҙөн ҡыҙыллыҡ ҡаплап алды **4.** (*затушить*) һыу һибеү, һыу һибеп һүндереү; **зали́ть ого́нь водо́й** утты һыу һибеп һүндереү **5.** (*покрыть чем-л. жидким*) ябыу, һалыу, ҡаплау; **зали́ть тротуа́р асфа́льтом** тротуарҙы асфальт менән ябыу; **зали́ть ло́дку смоло́й** кәмәне ыҫмала менән ҡаплау (буяу, ыҫмалалау) **6.** (*влить*) һалыу, ҡойоу; **зали́ть бензи́н в бак** бакка бензин ҡойоу **7.** *прост.* (*заделать отверстие*) йәбештереү, ямау; **зали́ть кастрю́лю** кәстрүлде ямау ♦ **зали́ть го́ре (тоску́)** эске менән ҡайғыны баҫыу; **зали́ть за га́лстук** *см.* **заложи́ть**

**ЗАЛИ́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** (*затопиться*) һыу менән ҡапланыу, һыу аҫтында ҡалыу; **у́лица залила́сь водо́й** урам һыу менән ҡапланды **2.** (*облиться*) өҫкә түгеү, түгеп бысратыу; **зали́ться со́усом** өҫкә соус түгеү **3.** *перен.* ҡыҙыллыҡ алыу (йүгереү, сығыу), ҡыҙарыу; **его́ лицо́ зали́ло́сь румя́нцем** йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, йөҙө ҡыҙарҙы **4.** *перен.* сумыу, мансылыу, ҡапланыу; **доли́на залила́сь луча́ми со́лнца** үҙән ҡояш нурҙарына сумды

**ЗАЛИ́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** (*начать издавать переливчатые звуки*) (*о соловье*) сутылдау, сут-сут итеү (килеү); (*о звонке*) зыңғырлау; (*о собаке*) сәңкеү; **солове́й залива́ется в саду́** һандуғас баҡсала сут-сут килә **2.** (*начать громко смеяться, петь и др.*) ҡысҡырып (яңғыратып) көлә (йырлай) башлау (ебәреү); **зали́ться пе́сней** яңғыратып йырлай башлау

**ЗАЛИХВА́ТСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* дәртле, бик елле; **залихва́тский па́рень** бик елле егет; **залихва́тская пе́сня** дәртле йыр

**ЗАЛО́Г I** *м* **1.** залог, закладҡа һалыу; **зало́г иму́щества** мөлкәтте закладҡа һалыу; **отда́ть в зало́г** *кого-что* залогка биреү **2.** *перен.* билге, нигеҙ; **зало́г дру́жбы** дуҫлыҡ билгеһе; **чистота́ — зало́г здоро́вья** таҙалыҡ — һаулыҡ нигеҙе

**ЗАЛО́Г II** *м*; *грам.* йүнәлеш; **действи́тельный зало́г** төп йүнәлеш; **взаи́мный зало́г** уртаҡлыҡ йүнәлеше; **возвра́тный зало́г** ҡайтым йүнәлеше; **страда́тельный зало́г** төшөм йүнәлеше

**ЗАЛО́ГОВЫЙ I,** -ая, -ое залог ...ы, заклад ...ы; **зало́говая квита́нция** залог квитанцияһы

**ЗАЛО́ГОВЫЙ II,** -ая, -ое *грам.* йүнәлеш ...ы

**ЗАЛОГОДА́ТЕЛЬ** *м* залогка һалыусы (биреүсе)

**ЗАЛОГОДЕРЖА́ТЕЛЬ** *м* залогка алыусы

**ЗАЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡуйыу, һалыу; **заложи́ть ру́ки за́ спину** ҡулды артҡа ҡуйыу; **заложи́ть ми́ну** мина ҡуйыу **2.** *что*; *разг.* (*засунуть*) һалыу, тығып (һалып) ҡуйыу, тығыу; **заложи́ть куда́-то кни́гу и забы́ть** китапты ҡайҙалыр һалыу һәм онотоу **3.** *что* һалыу; **заложи́ть ко́рма** аҙыҡ һалыу; **заложи́ть зерно́ на семена́** орлоҡҡа иген һалыу **4.** *что* (*отметить нужное место*) билдәләү, билдә һалыу; **заложи́ть ну́жную страни́цу** кәрәкле битте билдәләү **5.** *что* (*заполнить пустое пространство*) көпләү, бөтәштереү, ҡаплау; **заложи́ть окно́ кирпичо́м** тәҙрәне кирбес менән көпләү **6.** (*положить основание чему-л.*) нигеҙ һалыу; **заложи́ть дом** йортҡа нигеҙ һалыу; **заложи́ть па́мятник** һәйкәлгә нигеҙ һалыу **7.** *безл.*; *разг.* тоноу, ҡыҫыу; **грудь заложи́ло** күкрәк ҡыҫа; **у́ши заложи́ло** ҡолаҡ тонды **8.** *кого-что* (*запрячь*) егеү;

**заложи́ть лошаде́й** аттарҙы егеү **9.** *что* (*отдать в залог*) залогка һалыу; **заложи́ть золото́е кольцо́** алтын балдаҡты залогка һалыу **10.** *перен.* (*дать начало чему-л.*) нигеҙ һалыныу (һалыу); **в челове́ке зало́жены больши́е возмо́жности** кешегә ҙур мөмкинлектәр һалынған ♦ **заложи́ть осно́ву (фунда́мент)** *чего ниҙендер* үҫешенә нигеҙ һалыу; **заложи́ть (зали́ть) за га́лстук** *прост.* ныҡ ҡына төшөрөү (араҡы эсеү)

**ЗАЛО́ЖНИК** *м* и **ЗАЛО́ЖНИЦА** *ж* заложник, аманат

**ЗАЛОМИ́ТЬ I** *сов. что* **1.** *разг.* бөгөп һындырыу; **заломи́ть ве́тку** ботаҡты бөгөп һындырыу **2.** *прост.* артыҡ ҡиммәт һорау, (хаҡ) ҡайырыу; **заломи́ть це́ну** хаҡты артыҡ ҡиммәт һорау ♦ **заломи́ть ру́ки** ҡулын артҡа шаҡарыу; **заломи́ть ша́пку** бүректе ҡырын һалып кейеү

**ЗАЛОМИ́ТЬ II** *сов. безл.*; *разг.* һыҙлай башлау; **спи́ну заломи́ло** арҡа һыҙлай башланы

**ЗАЛОСНИ́ТЬ** *сов. что* ҡайышландырыу, керләндереп (ялтыратып) бөтөү; **залосни́ть сиде́нье** ултырған урынды ялтыратып бөтөү

**ЗАЛОСНИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡайышланып (керләнеп, майланып) бөтөү; **рукава́ залосни́лись** еңе(е) ҡайышланып бөткән

**ЗАЛП** *м* залп; **дать залп** залп бирeү

**ЗА́ЛПОМ** *нареч.* **1.** залп менән; **вы́стрелить за́лпом** залп менән атыу **2.** *перен.*, *разг.* бер юлы, бер тындан, берҙәм; **вы́пить за́лпом** бер тындан эсеп ҡуйыу

**ЗАЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **залучи́ть**

**ЗАЛУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* саҡырып (ҡыҙыҡтырып, ымһындырып) индереү, ҡыҙыҡтырып (алдаштырып, хәйләләп) алып инеү; **залучи́ть в го́сти** *кого-л. кемделер* ҡунаҡҡа саҡырып алып инеү (индереү)

**ЗАЛЫ́СИНА** *ж* пеләш, таҡыр баш

**ЗАЛЮБОВА́ТЬСЯ** *сов. кем-чем* һоҡланып ҡарап тороу; **залюбова́ться зака́том** ҡояш байыуын һоҡланып ҡарап тороу

**ЗАЛЯ́ПАТЬ** *сов. что*, *чем*; *прост.* түгеп (сәсрәтеп) бысратыу, бысраҡ сәсрәтеү (тейҙереү), буяу; **заля́пать костю́м** костюмға бысраҡ сәсрәтеү

**ЗАМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* буяу, буяп ҡуйыу; **зама́зать ту́шью** тушь менән буяу; **зама́зать на́дпись** яҙыуҙы буяп ҡуйыу **2.** *что* (*заделать чем-л.*) һылау, йәбештереү; **зама́зать о́кна на́ зиму** ҡышҡылыҡҡа тәҙрәләрҙе йәбештереү **3.** *кого-что* (*запачкать*) бысратыу, керләндереү; **зама́зать пла́тье са́жей** күлдәкте ҡоромға буяу **4.** *что*; *перен.*, *разг.* йәшереү, шымалау, йәшереп ҡалдырыу; **зама́зать недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе йәшереп ҡалдырыу

**ЗАМА́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бысраныу, буялыу, бысранып (буялып) бөтөү

**ЗАМА́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **зама́зать** 2; **зама́зка о́кон** тәҙрәләрҙе һылау **2.** (*вещество*) замазка, һыҙлыҡ; **око́нная зама́зка** тәҙрә замазкаһы

**ЗАМА́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **зама́зать**; **зама́зывание о́кон** тәҙрәләрҙе йәбештереү (һыҙлыҡлау); **зама́зывание противоре́чий** ҡаршылыҡтарҙы (шымартып) йәшереп ҡалдырыу

**ЗАМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **зама́зать**

**ЗАМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зама́заться 2.** *страд. от* **зама́зывать**

**ЗАМА́ЛЧИВАНИЕ** *с см.* **зама́лчивать**; **зама́лчивание оши́бок** хаталарҙы йәшереү

**ЗАМА́ЛЧИВАТЬ** *несов. см.* **замолча́ть** II

**ЗАМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **замани́ть**

**ЗАМАНИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡыҙыҡтырып (әүрәтеп, ылыҡтырып) алып килеү, хәйлә менән алып инеү; **замани́ть в заса́ду** хәйлә менән боҫҡонға индереү ♦ **калачо́м не зама́нишь** *см.* **кала́ч**

**ЗАМА́НЧИВО** *нареч.* ҡыҙығырҙай, ҡыҙығырлыҡ булып (итеп); **зама́нчиво блесте́ть** ҡыҙығырлыҡ булып ялтырау

**ЗАМА́НЧИВОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡтырырлыҡ (ҡыҙығырлыҡ) булыу; **зама́нчивость путеше́ствия** сәйәхәттең ҡыҙығырлыҡ булыуы

**ЗАМА́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡтырырлыҡ, ҡыҙығырлыҡ, ҡыҙыҡтырғыс; **зама́нчивые карти́ны бу́дущего** киләсәктең ҡыҙыҡтырғыс күренештәре

**ЗАМАРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* бысратыу, буяу; **замара́ть пла́тье** күлдәкте бысратыу **2.** *перен.*, *разг.* бысратыу, ҡара яғыу; **замара́ть неви́нного челове́ка** ғәйепһеҙ кешегә ҡара яғыу

**ЗАМАРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бысраныу, буялыу; **брю́ки замара́лись** салбар бысранды **2.** *перен.* (*опозорить себя чем-л.*) үҙенә (тап төшөрөү) ҡара яғыу

**ЗАМАРА́ШКА** *м* и *ж*; *разг.* әрпеш, шапшаҡ; **назва́ть замара́шкой** *кого-л. кемделер* әрпеш тип атау

**ЗАМА́РИВАТЬ** *несов. см.* **замори́ть**

**ЗАМАРИНОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** маринадлау; **замаринова́ть грибы́** бәшмәк маринадлау **2.** *перен.*, *прост.* туҡтатыу, тотҡарлау; **замаринова́ть строи́тельство** төҙөлөштө тотҡарлау

**ЗАМАРИНОВА́ТЬСЯ** *сов.* маринадланыу; **о́вощи замаринова́лись** йәшелсәләр маринадланған

**ЗАМАРИНО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **замаринова́ть**

**ЗАМАРИНО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **замаринова́ться**

**ЗАМАСКИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **замаскирова́ть 2.** *прил.* битлекле, битлек кейгән **3.** *прил.*; *перен.* йәшерен, аҫтыртын; **замаскиро́ванное наме́рение** йәшерен ниәт

**ЗАМАСКИРОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* маскировкалау, ҡаплап йәшереү; **замаскирова́ть ору́дия** орудиеларҙы маскировкалау **2.** *что*; *перен.* йәшереү; **замаскирова́ть свои́ наме́рения** үҙ ниәтеңде йәшереү

**ЗАМАСКИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** битлек (маскарад костюмы) кейеү **2.** (*сделаться незаметным*) йәшеренеү, маскировкаланыу; **солда́ты хорошо́ замаскирова́лись** һалдаттар яҡшы маскировкаланды

**ЗАМАСКИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **замаскирова́ть**

**ЗАМАСКИРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **замаскирова́ться** **2.** *страд. от* **замаскиро́вывать**

**ЗАМА́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **зама́слить** **2.** *прил.* майлы, майланған, майланып (майға) ҡатҡан; **зама́сленный хала́т** майға ҡатҡан халат

**ЗАМА́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **зама́слить**

**ЗАМА́СЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зама́слиться** **2.** *страд. от* **зама́сливать**

**ЗАМА́СЛИТЬ** *сов. что* майға буяу (ҡатырыу), май тамыҙып таплау; **зама́слить оде́жду** кейемде майға буяу

**ЗАМА́СЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** майға буялыу, майланып бөтөү; **рукава́ зама́слились** еңдәр(е) майланып бөткән **2.** (*заблестеть от удовольствия, вожделения — о глазах*) йылтырап (майланып) китеү, майланыу; **глаза́ его́ зама́слились** уның күҙҙәре майланып китте

**ЗАМАТОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *шахм.* мат ҡуйыу (*шахмат уйынында*); **заматова́ть короля́** королгә мат ҡуйыу

**ЗАМА́ТЫВАНИЕ** *с см.* **зама́тывать**; **зама́тывание шнура́** бауҙы урау

**ЗАМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **замота́ть** I

**ЗАМА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **замота́ться** **2.** *страд. от* **зама́тывать**

**ЗАМАХА́ТЬ** *сов.* болғай (һелкә) башлау; (*о крыльях птиц*) елпей башлау; **замаха́ть рука́ми** ҡул болғай башлау

**ЗАМА́ХИВАТЬСЯ** *несов. см.* **замахну́ться**

**ЗАМАХНУ́ТЬСЯ** *сов. чем, на кого* и *без доп.* киҙәнеү, һелтәнеү; **замахну́ться па́лкой** таяҡ менән киҙәнеү

**ЗАМА́ЧИВАНИЕ** *с см.* **зама́чивать**; **зама́чивание семя́н** орлоҡтарҙы еүешләү; **зама́чивание белья́** кер ебетеү

**ЗАМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **замочи́ть**

**ЗАМА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **замочи́ться** **2.** *страд. от* **зама́чивать**

**ЗАМА́ШКА** *ж*; *разг.* ғәҙәт, ҡылыҡ; **аристократи́ческие зама́шки** аристократтар ғәҙәте

**ЗАМА́ЯТЬ** *сов. кого*; *прост.* йөҙәтеп (интектереп) бөтөү, интектереү, йөҙәтеү

**ЗАМА́ЯТЬСЯ** *сов.*; *прост.* йөҙәп бөтөү, интегеү; **зама́яться на жаре́** эҫелә йөҙәп бөтөү

**ЗАМАЯ́ЧИТЬ** *сов.*; *разг.* күренеү, күренә башлау; **вдали́ замая́чили огни́** алыҫта уттар күренде

**ЗАМЕДЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **заме́длить, заме́длиться**; **замедле́ние движе́ния** хәрәкәттең әкренәйеүе **2.** (*задержка*) тотҡарлыҡ; **причи́на замедле́ния** тотҡарлыҡтың сәбәбе

**ЗАМЕ́ДЛЕННОСТЬ** *ж* аҡрынлыҡ, һүлпәнлек; **заме́дленность реа́кции** реакцияның аҡрынлығы

**ЗАМЕ́ДЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заме́длить** **2.** *прил.* аҡрын (әкрен), яй; **заме́дленный ход по́езда** поездың яй барыуы (аҡрын хәрәкәте) ♦ **ми́на заме́дленного де́йствия** күпмеләр ваҡыттан һуң шартлай торған мина

**ЗАМЕ́ДЛИТЬ** *сов.* **1.** *что* аҡрынайтыу, әкренәйтеү, яйлатыу; **заме́длить шаги́** аҙымды әкренәйтеү, яйыраҡ атлай башлау **2.** *с чем* и *с неопр.* (*задержать, запоздать*) тотоу, оҙаҡлатыу, кисектереү; **заме́длить с отве́том** яуапты кисектереү; **не заме́длить с выполне́нием пла́на** план үтәүҙе кисектермәү (оҙаҡлатмау)

**ЗАМЕ́ДЛИТЬСЯ** *сов.* әкренәйеү, аҡрынайыу, яйлау; **движе́ние заме́длилось** хәрәкәт әкренәйҙе

**ЗАМЕДЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **заме́длить**

**ЗАМЕДЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заме́длиться** **2.** *страд. от* **замедля́ть**

**ЗАМЕЛЬКА́ТЬ** *сов.* күренеп китеү (ҡалыу), (күҙгә) салыныу; **замелька́ть пе́ред глаза́ми** күҙ алдында күренеп ҡалыу

**ЗАМЕ́НА** *ж* **1.** *см.* **замени́ть — заменя́ть**; **заме́на дета́лей** деталдәрҙе алмаштырыу **2.** алмаш, алмашсы; **найти́ себе́ заме́ну** үҙеңә алмаш табыу

**ЗАМЕНИ́МЫЙ,** -ая, -ое алмаштырырлыҡ, алыштырырлыҡ, алмаштыра алырлыҡ; **замени́мая дета́ль** алмаштырырлыҡ деталь

**ЗАМЕНИ́ТЕЛЬ** *м* алыштырырлыҡ (алмаштырырлыҡ) нәмә; **замени́тель ко́жи** күнде алмаштырырлыҡ нәмә

**ЗАМЕНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чем* алмаштырыу, алыштырыу; **замени́ть мета́лл пластма́ссой** металды пластмасса менән алмаштырыу **2.** *кого-что* (*занять место*) алмаштырыу, урынына ҡалыу; **замени́ть ребёнку мать** баланың әсәһе урынына ҡалыу

**ЗАМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* алмашыныу, алышыныу; **шум замени́лся зву́ками му́зыки** шау-шыу музыка тауышы менән алмашынды

**ЗАМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **замени́ть**

**ЗАМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **замени́ться** **2.** *страд. от* **заменя́ть**

**ЗАМЕ́Р** *м*; *спец. см.* **заме́рить**; **заме́р объёма** күләмде үлсәү

**ЗАМЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** туҡтап (ҡатып) ҡалыу, шып туҡтау, шаҡ ҡатыу; **замере́ть от у́жаса** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу **2.** *перен.* туҡтау, тыныу, тымыу, тымып (тынып) ҡалыу; **движе́ние за́мерло** хәрәкәт туҡтаны; **зву́ки за́мерли** тауыштар тымды; **рабо́та замерла́** эш туҡтап ҡалды **3.** (*остаться невысказанным, непроизнесённым — о словах, звуках*) әйтелмәй (һөйләнмәй) ҡалыу; **слова́ за́мерли на уста́х** һүҙҙәр әйтелмәй ҡалды

**ЗАМЕРЗА́НИЕ** *с см.* **замерза́ть**; **замерза́ние воды́** һыуҙың туңыуы ♦ **то́чка замерза́ния** *физ.* туңыу нөктәһе; **на то́чке замерза́ния** бер урында, үҙгәрешһеҙ

**ЗАМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **замёрзнуть**

**ЗАМЁРЗНУТЬ** *сов.* **1.** (*оледенеть*) туңыу; **река́ замёрзла** йылға туңған **2.** туңып үлеү, һыуыҡтан һәләк булыу, өшөү; **замёрзнуть на доро́ге** юлда туңып үлеү; **цветы́ замёрзли** сәскәләр өшөгән **3.** *разг.* ныҡ өшөү, туңыу; **у меня замёрзли́ ру́ки** ҡулдарым ныҡ өшөнө

**ЗАМЕ́РИВАТЬ** *несов. см.* **заме́рить**

**ЗАМЕ́РИТЬ** *сов.* үлсәү, үлсәп сығыу; **заме́рить длину́** оҙонлоҡто үлсәү

**ЗАМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое үлсәү ...ы; **заме́рная устано́вка** үлсәү ҡорамалы

**ЗА́МЕРТВО** *нареч.* иҫтән яҙып, һушһыҙ булып; **упа́сть за́мертво** һушһыҙ булып йығылыу

**ЗАМЕ́РЩИК** *м* үлсәүсе

**ЗАМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **заме́рить**

**ЗАМЕ́С** *м*; *спец.* **1.** *см.* **замеси́ть**; **заме́с те́ста** ҡамыр баҫыу **2.** (*полученная при замешивании масса*) баҫма, болғанған нәмә, иҙмә, болғама; **муки́ оста́лось то́лько на оди́н заме́с** он бер иҙмәлек ҡалды

**ЗАМЕСИ́ТЬ** *сов. что* баҫыу, иҙеү, баҫып (иҙеп) ҡуйыу; **замеси́ть те́сто** ҡамыр баҫыу

**ЗАМЕСИ́ТЬСЯ** *сов.* иҙелеү, баҫылыу; **грязь замеси́лась** батҡаҡ иҙелде

**ЗАМЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* һеперею, һеперәп өйөү; **замести́ сор в у́гол** сүп-сарҙы мөйөшкә һеперәп өйөү **2.** *кого-что* и *без доп.* күмеү, ҡаплау, баҫыу, күмеп (баҫып) китеү; **доро́гу замело́ сне́гом** *безл.* юлды ҡар баҫып киткән **3.** *перен.*, *прост.* ҡулға алыу, эләктереү ♦ **замести́ след(ы́)** эҙен юйыу (юғалтыу)

**ЗАМЕСТИ́ТЕЛЬ** *м* урынбаҫар; **замести́тель дире́ктора** директор урынбаҫары

**ЗАМЕСТИ́ТЕЛЬСТВО** *с* ваҡытлыса эшләү (*кеше урынында*), урынбаҫар булыу

**ЗАМЕСТИ́ТЬ** *сов. см.* **замеща́ть** 2

**ЗАМЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **замести́**

**ЗАМЕТА́ТЬ II** *сов. что* типсеү, типсеп сығыу; **замета́ть рукава́** еңдәрҙе типсеп сығыу

**ЗАМЕТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ары-бире һуғылыу, үрһәләнеп йөрөү; **замета́ться в отча́янии** ни эшләргә белмәй ары-бире һуғылыу

**ЗАМЕ́ТИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* күреү, күреп ҡалыу (алыу), һиҙеү; **заме́тить дымо́к вдали́** алыҫта төтөн күреп ҡалыу; **я за ним ничего́ плохо́го не заме́тил** мин унда бер насарлыҡ та һиҙмәнем **2.** *кого-что* (*отметить*, *запомнить*) иҫкә алып ҡуйыу, хәтерҙә ҡалдырыу; **заме́тить у́лицу** урамды хәтерҙә ҡалдырыу **3.** *что* (*пометить*) билдәләү, билдә ҡуйыу; **заме́тить страни́цу кни́ги** китаптың битен билдәләү **4.** әйтеү, тиеү; **"Хорошо́", — заме́тил он** "Яҡшы", — тине ул

**ЗАМЕ́ТКА** *ж* **1.** билдә, тамға; **заме́тка на стене́** стенаға яһалған билдә **2.** ҡыҫҡа яҙма, яҙма(лар); **заме́тки в блокно́те** блокноттағы ҡыҫҡа яҙма; **путевы́е заме́тки** юл яҙмалары **3.** ҡыҫҡа мәҡәлә; **газе́тная заме́тка** гәзиттәге ҡыҫҡа мәҡәлә ♦ **брать (взять) на заме́тку** яҙып ҡуйыу; хәтерҙә (иҫтә) ҡалдырыу

**ЗАМЕ́ТНО 1.** *нареч.* һиҙелерлек (беленерлек) дәрәжәлә, хәтһеҙ; **он заме́тно похуде́л** ул хәтһеҙ ябыҡҡан **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* һиҙелеп (беленеп) тороу, күренеп тороу; **бы́ло заме́тно, что он волну́ется** уның тулҡынланыуы һиҙелеп тора ине

**ЗАМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һиҙелеп (беленеп, күренеп) торған, һиҙелерлек, беленерлек; **заме́тный след от ране́ния** күренеп торған яра эҙе **2.** (*видный*, *известный*) күренекле, билдәле; **он челове́к заме́тный** ул билдәле кеше

**ЗАМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **замета́ть** II

**ЗАМЕЧА́НИЕ** *с* **1.** иҫкәрмә, күрһәтмә; **ве́рное замеча́ние** дөрөҫ күрһәтмә **2.** (*выговор*) шелтә, иҫкәртмә, киҫәтеү; **сде́лать замеча́ние** иҫкәртмә, киҫәтеү яһау; **крити́ческое замеча́ние** тәнҡитле иҫкәртмә

**ЗАМЕЧА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иҫ киткес, бына тигән, һоҡланғыс, бик яҡшы, бик шәп; **замеча́тельный писа́тель** бик шәп яҙыусы; **замеча́тельный челове́к** бына тигән кеше

**ЗАМЕЧА́ТЬ** *несов. см.* **заме́тить**

**ЗАМЕЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һиҙелеү, һиҙелеп (күренеп) тороу, күренеү; **замеча́ются при́знаки уста́лости** арығанлыҡ билдәләре һиҙелеп тора **2.** *страд. от* **замеча́ть**

**ЗАМЕЧТА́ТЬСЯ** *сов.* хыялға бирелеү (батыу, сумыу), онотолоп тороу

**ЗАМЕША́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** буталсыҡлыҡ, буталыш, тәртипһеҙлек; **внести́ замеша́тельство** буталыш индереү **2.** (*смущение*) ҡаушау, ҡаушап ҡалыу, аптыраш; **прийти́ в замеша́тельство** аптырашта ҡалыу; **прояви́ть замеша́тельство** ҡаушап ҡалыу

**ЗАМЕША́ТЬ** *сов. кого-что, во что* ҡатнаштырыу, бутау, тартыу, ылыҡтырыу (*берәй эшкә, енәйәткә*); **замеша́ть в полити́ческие дела́** сәйәси эштәргә ҡатнаштырыу

**ЗАМЕША́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* ҡатнашыу, ҡыҫылыу; **замеша́ться в неприя́тную исто́рию** хәүефле эшкә ҡатнашыу **2.** (*затеряться*) инеп юғалыу, буталып китеү; **замеша́ться в толпе́** халыҡ араһына инеп юғалыу

**ЗАМЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **замеси́ть**

**ЗАМЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **замеша́ть**

**ЗАМЕ́ШИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **замеси́ться 2.** *страд. от* **заме́шивать** I

**ЗАМЕ́ШИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **замеша́ться 2.** *страд. от* **заме́шивать** II

**ЗАМЕ́ШКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡлау, яй ҡыланыу, мыштырлау; **заме́шкаться с отве́том** яуап менән яй ҡыланыу

**ЗАМЕЩА́ТЬ** *несов.* **1.** (*заменять собой*) урынын алыу, биләү, урынына ҡуйыу, алмаштырыу; **замеща́ть до́лжность секретаря́** секретарь урынын алыу **2.** *кого* (*временно*) алмаштырып тороу, урынына ҡалыу; **замеща́ть дире́ктора** директор урынына ҡалыу

**ЗАМЕЩЕ́НИЕ** *с см.* **замеща́ть**; **замеще́ние вака́нтной до́лжности** вакант вазифаны биләү

**ЗАМИГА́ТЬ** *сов.* **1.** күҙҙәрҙе бер асып бер йома башлау **2.** (*замерцать*) йымылдау, емелдәү, йым-йым (ем-ем) итеү; **замига́ли звёзды** йондоҙҙар ем-ем итә башланы

**ЗАМИНИ́РОВАТЬ** *сов. что* миналау, мина һалыу, миналар ҡуйып сығыу; **замини́ровать мост** күпергә мина һалыу

**ЗАМИ́НКА** *ж*; *разг.* **1.** тотҡарлыҡ, ҡамасау; **в де́ле вы́шла зами́нка** эштә тотҡарлыҡ килеп сыҡты **2.** ыҡ-мыҡ итеү, тотлоғоу; **говори́ть с зами́нкой** тотлоғоп һөйләү

**ЗАМИРА́НИЕ** *с см.* **замира́ть**; **замира́ние зву́ков** тауыштарҙың тымыуы ♦ **с замира́нием се́рдца** тын да алмай, бик ныҡ тулҡынланып, ҡото осоп

**ЗАМИРА́ТЬ** *несов. см.* **замере́ть**

**ЗА́МКНУТОСТЬ** *ж* **1.** йомоҡлоҡ, аралашмаусанлыҡ, асылып (һөйләшеп) бармау; **за́мкнутость хара́ктера** холоҡтоң йомоҡлоғо **2.** сикләнгәнлек; **за́мкнутость простра́нства** арауыҡтың сикләнгәнлеге

**ЗА́МКНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **замкну́ть** **2.** *прил.* ҡатнашмай (һөйләшеп бармай) торған, аралашмаусан, йомоҡ; **за́мкнутый челове́к** йомоҡ кеше **3.** *прил.* (*замыкающийся*) тоташтырылған; **за́мкнутая крива́я** тоташтырылған ҡыя һыҙыҡ **4.** *прил.* сикләнгән,ябыҡ; **за́мкнутое простра́нство** сикләнгән арауыҡ

**ЗАМКНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** *прост.* бикләү, йоҙаҡлау; **замкну́ть дверь** ишекте бикләү **2.** тоташтырыу, яһау; **замкну́ть круг** түңәрәк яһау; **замкну́ть цепь** *эл.* сымды тоташтырыу (*ток сығанағына*)

**ЗАМКНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прост.* бикләнеү; **замо́к замкну́лся** йоҙаҡ бикләнде **2.** (*соединиться*) тоташыу; **цепь замкну́лась** *эл.* сым тоташты **3.** *во что, в чём* (кеше менән) аралашмау, бикләнеү, йомоҡланыу, йомолоу; **замкну́ться в семе́йном кругу́** ғаилә эсендә генә йомолоп йәшәү

**ЗАМОГИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*о голосе*) ҡарлыҡҡан, тоноҡ, ер аҫтынан килгән кеүек; **замоги́льный го́лос** тоноҡ тауыш

**ЗА́МОК** *м* замок, һарай; **средневеко́вый за́мок** урта быуат һарайы ♦ **возду́шные за́мки** буш хыял

**ЗАМО́К** *м* **1.** йоҙаҡ, бик; **дверно́й замо́к** ишек йоҙағы; **вну́тренний замо́к** эске йоҙаҡ; **запере́ть на замо́к** йоҙаҡлау (бикләү, йоҙаҡ һалыу) **2.** *воен.* затвор, замок; **замо́к ору́дия** ҡорал замоғы **3.** *тех.* замок (*ағас ҡорамалдарҙың өлөштәрен ялғау ысулы*) ♦ **держа́ть под замко́м** бикле тотоу; **за семью́ замка́ми** ете ҡат бик аҫтында

**ЗАМО́КНУТЬ** *сов.*; *прост.* ебеү, бүртеү, шешенеү; **бельё замо́кло** кер ебене; **до́ски замо́кли** таҡталар шешенгән

**ЗАМО́ЛВИТЬ: замо́лвить сло́во (слове́чко)** (кеше өсөн) һүҙ әйтеп ебәреү (*үтенеп, һорап*)

**ЗАМОЛКА́ТЬ** *несов. см.* **замо́лкнуть**

**ЗАМО́ЛКНУТЬ** *сов.* туҡталыу, тымыу, тымып (тынып) ҡалыу; **зву́ки замо́лкли** тауыштар тымып ҡалды; **ребёнок замо́лк** бала тымды

**ЗАМОЛЧА́ТЬ I** *сов.* **1.** һөйләүҙән (һүҙҙән) туҡтау, тымыу, шымыу; **расска́зчик замолча́л** һөйләүсе һүҙенән туҡтаны **2.** *перен.* яҙмай башлау, (хат) яҙыуҙан туҡтау **3.** *перен.* атыуҙан туҡтау, атмай башлау; **пулемёт замолча́л** пулемёт атыуҙан туҡтаны

**ЗАМОЛЧА́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* белә тороп өндәшмәү (әйтмәү, йәшереү); **замолча́ть происходя́щие собы́тия** булып ятҡан ваҡиғалар тураһында белә тороп өндәшмәү

**ЗАМОРА́ЖИВАНИЕ** *с см.* **заморо́зить**; **замора́живание ры́бы** балыҡ туңдырыу; **замора́живание зарпла́ты** эш хаҡын арттырмау

**ЗАМОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **заморо́зить**

**ЗАМОРГА́ТЬ** *сов.* күҙ ҡыҫҡылау (йомғолау), сылт-сылт йомоу

**ЗАМОРДОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* яфа сиктереү, интектереү, ғазаплау

**ЗАМОРИ́ТЬ** *сов.*; *разг. кого-что* яфалау, интектереү; **замори́ть ло́шадь** атты интектереү (яфалау) ♦ **замори́ть червячка́** тамаҡ ялғау, ҡапҡылап алыу

**ЗАМОРО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заморо́зить** **2.** *прил.* туң, туңған, туңдырылған; **заморо́женное лицо́** туңған бит

**ЗАМОРО́ЗИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* туңдырыу, ҡатырыу; **заморо́зить мя́со** итте туңдырыу **2.** *что*; *разг.* һыуытыу; **заморо́зить пи́во** һыраны һыуытыу **3.** *что*; *перен.* арттырмау, үҙгәрешһеҙ ҡалдырыу, файҙаланмай тотоу, туҡтатыу; **заморо́зить зарпла́ту** эш хаҡын арттырмау; **заморо́зить фо́нды** фондтарҙы файҙаланмай тотоу

**ЗА́МОРОЗКИ** *мн.* (*ед.* **за́морозок** *м*) ҡырау; **весе́нние за́морозки** яҙғы ҡырауҙар; **осе́нние за́морозки** көҙгө ҡырауҙар

**ЗАМОРОСИ́ТЬ** *сов.* һибәләй (быҫҡаҡлай) башлау; **дождь замороси́л** ямғыр һибәләй (быҫҡаҡлай) башланы

**ЗАМОРО́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* башты әйләндереү (ҡаңғыртыу)

**ЗАМО́РСКИЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт., уст.* диңгеҙ аръяғы(ндағы); **замо́рские стра́ны** диңгеҙ аръяғы илдәре

**ЗАМО́РЫШ** *м*; *разг.* өтөк, сибек, бүлтерек (*үҫмәй, ҡатып ҡалған мал-тыуар, ҡош-ҡорт йәки кешегә ҡарата*)

**ЗАМОСТИ́ТЬ** *сов. что* таш түшәү (йәйеү); **замости́ть у́лицу** урамға таш түшәү

**ЗАМОТА́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* урау, сырмау, урап ҡуйыу; **замота́ть ше́ю платко́м** яулыҡ менән муйынды урап ҡуйыу **2.** *кого*; *перен.*, *прост.* (*утомить*, *измучить*) арытыу, хәлдән тайҙырыу, арманһыҙ булыу (итеү); **замота́ть ло́шадь** атты хәлдән тайҙырыу

**ЗАМОТА́ТЬ II** *сов. чем* (*начать мотать*) болғай (һелкә, сайҡай) башлау, һелкеү; **замота́ть хвосто́м** ҡойроҡ болғай башлау; **замота́ть голово́й** баш һелкеү

**ЗАМОТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чем*; *разг.* сырмалыу, уралыу; **замота́ться ша́рфом** шарф менән уралыу **2.** *перен.*, *прост.* (*утомиться*, *измучиться*) арыу, арманһыҙ булыу, интегеп бөтөү

**ЗАМОЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** еүешләү, сылатыу; **замочи́ть но́ги** аяҡ(ты) сылатыу **2.** ебетеү, һыуға һалып (батырып) ҡуйыу; **замочи́ть бельё** керҙе ебетеү; **замочи́ть коноплю́** киндерҙе (тарманы) һыуға һалыу

**ЗАМОЧИ́ТЬСЯ** *сов.* еүешләнеү, сыланыу; **но́ги замочи́лись** аяҡ еүешләнде

**ЗАМО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое йоҙаҡ, бик ...ы; **замо́чная сква́жина** йоҙаҡ тишеге

**ЗА́МУЖ: вы́йти (выходи́ть) за́муж** кейәүгә (тормошҡа, иргә) сығыу; **вы́дать (отда́ть) за́муж** кейәүгә биреү

**ЗА́МУЖЕМ** *нареч.* кейәүҙә, ирҙә, тормошта; **быть за́мужем** кейәүҙә булыу

**ЗАМУ́ЖЕСТВО** *с* ирҙә булыу, ир менән йәшәү; **счастли́вое заму́жество** ир менән бәхетле булыу (йәшәү), бәхетле никах

**ЗАМУ́ЖНИЙ,** -яя, -ее ирле, иргә сыҡҡан, ир менән торған; **заму́жняя же́нщина** ирле ҡатын; **заму́жняя жизнь** ир менән йәшәү

**ЗАМУРЛЫ́КАТЬ** *сов.* **1.** (*о кошке*) мырлау, мырылдай башлау **2.** *что*; *перен.* (*тихо запеть*) эстән генә йырлау (көйләү), мөңрәү

**ЗАМУРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* томалап (көпләп) ҡуйыу; **замурова́ть окно́** тәҙрәне көпләп ҡуйыу

**ЗАМУРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **замурова́ть**

**ЗАМУСО́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **замусо́лить**

**ЗАМУСО́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **замусо́литься 2.** *страд. от* **замусо́ливать**

**ЗАМУСО́ЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* керләндереү, ҡайышландырыу, майға ҡатырып бөтөрөү

**ЗАМУСО́ЛИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡайышланып бөтөү, майға ҡатып бөтөү

**ЗАМУ́СОРИТЬ** *сов. что* сүпләндереү, сүпсар тултырыу

**ЗАМУ́СОРИТЬСЯ** *сов.* сүпләнеп бөтөү, сүпсар менән тулыу

**ЗАМУТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** буръяҡлау, болғандырыу, ҡомартыу; **замути́ть во́ду** һыуҙы буръяҡлау (ҡомартыу) **2.** *перен.* тынысһыҙ хәлгә килтереү, болартыу

**ЗАМУТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** буръяҡланыу, болғансыҡланыу, ҡомарыу; **река́ замути́лась** йылға болғансыҡланды **2.** тынысһыҙ хәлгә килеү, боларыу

**ЗАМУТНЕ́ТЬ** *сов.* буръяҡланыу

**ЗАМУХРЫ́ШКА** *м* и *ж*; *прост.* өтөк, хәстрүш (*хәлһеҙ*, *йонсоу кешегә ҡарата*)

**ЗАМУ́ЧИТЬ** *сов. кого* **1.** ғазаплап (язалап) үлтереү; **его́ заму́чили в тюрьме́** уны төрмәлә язалап үлтергәндәр **2.** яфалау, йонсотоу, интектереү, ыҙалатып (йонсотоп, яфалап, интектереп) бөтөү; **боле́знь заму́чила ребёнка** баланы ауырыу (сир) йонсотто

**ЗАМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.* яфаланып (йонсоп, йөҙәп) бөтөү, тамам интегеү (йонсоу)

**ЗА́МША** *ж* замша (*йомшаҡ күн*); **ту́фли из за́мши** замша туфли

**ЗА́МШЕВЫЙ,** -ая, -ое замша, замшанан эшләнгән; **за́мшевые перча́тки** замша бирсәткә

**ЗАМШЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое мүкләнгән, мүк баҫҡан (ҡаплаған); **замше́лый пень** мүк баҫҡан төп(һә)

**ЗАМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **замы́ть**

**ЗАМЫ́ЗГАННЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** *прич. от* **замы́згать 2.** *прил.* бысраҡ, керле, бысранған, керләнгән; **замы́зганный костю́м** бысраҡ костюм

**ЗАМЫ́ЗГАТЬ** *сов. что*; *прост.* бысратып (керләндереп) бөтөү, бысраҡҡа (кергә) ҡатырыу; **замы́згать брю́ки** салбарҙы бысратып бөтөү

**ЗАМЫ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **замы́згать**

**ЗАМЫКА́НИЕ** *с см.* **замыка́ть ♦ коро́ткое замыка́ние** *эл.* ҡыҫҡа замыкание

**ЗАМЫКА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **замкну́ть 2.** *что* (*быть в конце*) иң артта барыу, артында (осонда, аҙағында) булыу; **замыка́ть отря́д** отрядтың аҙағында барыу

**ЗАМЫКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **замкну́ться 2.** *страд. от* **замыка́ть**

**ЗАМЫКА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **замыка́ть 2.** *в знач. сущ.* **замыка́ющий** *м* арттан барыусы (*сафҡа ҡарата*)

**ЗА́МЫСЕЛ** *м* **1.** ниәт, теләк, уй; **осуществи́ть за́мысел** ниәтте тормошҡа ашырыу **2.** (*идея*) төп фекер, төп идея; **за́мысел пье́сы** пьесаның төп идеяһы

**ЗАМЫ́СЛИТЬ** *сов. что* и *с неопр.* уйлап ҡуйыу, ниәтләү; **замы́слить побе́г** ҡасырға уйлап ҡуйыу, ҡасырға ниәтләү

**ЗАМЫСЛОВА́ТОСТЬ** *ж* хикмәтлелек, аңлауға ҡыйын (ауыр) булыу; **замыслова́тость отве́та** яуаптың хикмәтлелеге

**ЗАМЫСЛОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое хикмәтле, аңлауы ҡыйын (ауыр), әкәмәт, сәйер; **замыслова́тый вопро́с** хикмәтле һорау; **замыслова́тая речь** аңлауы ауыр телмәр

**ЗАМЫ́ТЬ** *сов. что* йыуып бөтөрөү (китеү); **замы́ть пятно́** тапты йыуып бөтөрөү; **дождь замы́л следы́** ямғыр эҙҙәрҙе йыуып киткән

**ЗАМЫЧА́ТЬ** *сов.* мөңрәй (баҡыра) башлау, мөңрәп (баҡырып) ебәреү

**ЗАМЫШЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **замы́слить**

**ЗАМЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** иҙеп ташлау; **замя́ть оку́рок** тәмәке төпсөгөн иҙеп ташлау **2.** баҫырып ҡалдырыу, йомоу, туҡтатыу; **замя́ть де́ло** эште баҫырып ҡалдырыу

**ЗАМЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** ҡаушап ҡалыу, ҡаушап туҡтап ҡалыу; **он замя́лся у воро́т** ул ҡапҡа янында ҡаушап туҡтап ҡалды **2.** ни эйтергә белмәү, ыҡ-мыҡ итеү; **он замя́лся и замолча́л** ул ыҡ-мыҡ итте лә өндәшмәй туҡтап ҡалды

**ЗА́НАВЕС** *м* шаршау, ҡорма, ҡорған, пәрҙә; **подня́ть за́навес** шаршауҙы күтәреү; **опусти́ть за́навес** шаршауҙы төшөрөү ♦ **под за́навес** берәй эш-хәлдең аҙағында

**ЗАНАВЕ́СИТЬ** *сов. что* шаршау ҡороу; **занаве́сить окно́** тәҙрәгә пәрҙә ҡороу

**ЗАНАВЕ́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* шаршау (ҡорма) менән ҡороп ҡуйыу, ҡапланыу

**ЗАНАВЕ́СКА** *ж* ҡорған, ҡорма, пәрҙә; **око́нная занаве́ска** тәҙрә ҡорғаны; **купи́ть ткань для занаве́ски** ҡормаға тауар һатып алыу

**ЗАНАВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **занаве́сить**

**ЗАНАВО́ЗИТЬ** *сов. что* **1.** *с.-х.* тиреҫләү, тиреҫ менән ашлау **2.** *прост.* ҡыйлау, сүпләү; **занаво́зить двор** ишек алдын ҡыйлау

**ЗАНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **заноси́ть** II

**ЗАНЕВЕ́СТИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* үҫеп етеү, буй етеү (*ҡыҙҙарға ҡарата*); **де́вушки заневе́стились** ҡыҙҙар үҫеп етте

**ЗАНЕМЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ойоу; **рука́ занеме́ла** ҡул ойоно

**ЗАНЕМО́ЧЬ** *сов.*; *уст.* ауырып китеү, сырхап тороу

**ЗАНЕ́РВНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* ҡыҙып (асыуланып, борсолоп) китеү, туҙына башлау

**ЗАНЕСЕ́НИЕ** *с см.* **занести́** 1—3; **занесе́ние в спи́сок** исемлеккә индереү

**ЗАНЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* индереп биреү (сығыу, ҡуйыу); **занести́ кни́гу** китапты индереп биреү; **занести́ ве́щи в ко́мнату** әйберҙәрҙе бүлмәгә индереп ҡуйыу **2.** *кого-что* (яҙмаға) индереү, яҙып ҡуйыу, теркәү; **занести́ в протоко́л** протоколға теркәү; **занести́ в спи́сок** исемлеккә яҙып ҡуйыу **3.** *что* күтәреү, һоноу; **занести́ ру́ку для уда́ра** һуғырға ҡул күтәреү **4.** *кого-что безл.* баҫыу, баҫып (ҡаплап) китеү; **сне́гом занесло́ доро́гу** юлды ҡар баҫҡан **5.** *безл.* ситкә сығарыу, алып китеү, барып төшөү; **маши́ну занесло́ в кана́ву** машина канауға барып төштө **6.** *что* күсереп ҡуйыу, шылдырыу; **занести́ коне́ц бревна́** бүрәнәнең башын күсереп ҡуйыу **7.** *кого-что* (алып) барып индереү (инеү); **его́ занесло́ в толпу́** ул төркөм эсенә барып инде

**ЗАНЕСТИ́СЬ I** *сов.*; *разг.* эреләнеп (маһайып) китеү

**ЗАНЕСТИ́СЬ II** *сов.* йомортҡа һала башлау

**ЗАНИЖА́ТЬ** *несов. см.* **зани́зить**

**ЗАНИЖЕ́НИЕ** *с см.* **зани́зить**; **заниже́ние норм** нормалар кәметеү

**ЗАНИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **зани́зить 2.** *прил.* кәм, түбән; **зани́женные тре́бования** түбән талаптар

**ЗАНИ́ЗИТЬ** *сов. что* түбәнәйтеү, кәметеү; **зани́зить но́рмы** нормаларҙы кәметеү; **зани́зить оце́нки** билдәләрҙе түбәнәйтеү

**ЗАНИМА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡлыҡ, мәрәкәлек; **занима́тельность игры́** уйындың ҡыҙыҡлығы

**ЗАНИМА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс; **занима́тельная грамма́тика** ҡыҙыҡлы грамматика; **занима́тельный расска́з** ҡыҙыҡлы хикәйә

**ЗАНИМА́ТЬ I** *несов. см.* **заня́ть** I

**ЗАНИМА́ТЬ II** *несов. см.* **заня́ть** II

**ЗАНИМА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **занима́ть** I

**ЗАНИМА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *чем* шөғөлләнеү, булышыу, әҙерләнеү; **занима́ться свои́м де́лом** үҙ эшең менән булышыу; **занима́ться в библиоте́ке** китапханала әҙерләнеү (уҡып ултырыу); **занима́ться хозя́йством** хужалыҡ менән шөғөлләнеү **2.** *с кем-чем* уҡытыу, дәрес үткәреү; **занима́ться с ученика́ми** уҡыусылар менән дәрес үткәреү

**ЗА́НОВО** *нареч.* яңынан, ҡабаттан, ҡайтанан, өр-яңынан; **сде́лать рабо́ту за́ново** эште яңынан эшләү; **за́ново созда́ть о́трасль промы́шленности** сәнәғәттең берәй тармағын өр-яңынан булдырыу

**ЗАНО́ЗА 1.** *ж* шырау, сүп; **вы́тащить зано́зу из па́льца** бармаҡтан шыраyҙы алыу **2.** *м* и *ж*; *прост.* (*о придирчивом, язвительным человеке*) бәйләнсек, һағыҙаҡ

**ЗАНО́ЗИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** шыраулы, ҡытыршы; **зано́зистая доска́** шыраулы таҡта **2.** *перен.* бәйләнсек; **зано́зистый челове́к** бәйләнсек кеше

**ЗАНОЗИ́ТЬ** *сов. что* шырау ҡаҙалтыу (инеү); **занози́ть па́лец** бармаҡҡа шырау индереү

**ЗАНО́С** *м* (*снежный*) көрт, һырын, һырынты; (*песчаный*) өйөм, ҡом баҫыу

**ЗАНОСИ́ТЬ I** *несов. см.* **занести́**

**ЗАНОСИ́ТЬ II** *сов. что* (кейеп) туҙҙырыу, таушалдырыу, тетеү; **заноси́ть пальто́** пальтоны туҙҙырыу

**ЗАНОСИ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **занести́сь** I; **2.** *страд. от* **заноси́ть** I

**ЗАНОСИ́ТЬСЯ II** *сов.* туҙыу, таушалыу, тетелеү; **носки́ заноси́лись** ойоҡбаштар туҙҙы

**ЗАНО́СНЫЙ,** -ая, -ое ситтән килтерелгән; **зано́сные ка́мни** ситтән килтерелгән таштар

**ЗАНО́СЧИВО** *нареч.* эре, тәкәббер, һауалы; **вести́ себя́ зано́счиво** үҙеңде эре тотоу

**ЗАНО́СЧИВОСТЬ** *ж* эрелек, тәкәбберлек, һауалылыҡ, маһайыусанлыҡ; **отлича́ться зано́счивостью** тәкәбберлек менән айырылып тороу

**ЗАНО́СЧИВЫЙ,** -ая, -ое эре, тәкәббер, һауалы, маһайыусан; **зано́счивый вид** тәкәббер ҡиәфәт; **зано́счивый отве́т** һауалы яуап

**ЗАНОЧЕВА́ТЬ** *сов.* ҡуныу, ҡунып ҡалыу, йоҡлап сығыу; **заночева́ть в по́ле** яланда ҡуныу

**ЗАНОЧЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **заночева́ть**

**ЗАНО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заноси́ть** II; **2.** *прил.* туҙған, иҫке; **зано́шенная руба́шка** туҙған күлдәк

**ЗАНУ́ДА** *м* и *ж*; *прост.*, *презр.*, *бран.* эс бошорғос (йән көйҙөргөс) кеше, йән көйөгө

**ЗАНУ́ДНЫЙ** и **ЗАНУ́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* ялҡытҡыс, мыжыҡ, бәйләнсек

**ЗАНУЗДА́ТЬ** *сов. кого* ауыҙлыҡлау; **зануздá́ть ло́шадь** атты ауыҙлыҡлау

**ЗАНУ́ЗДЫВАТЬ** *несов. см.* **зануздá́ть**

**ЗАНУМЕРОВА́ТЬ** *сов. что* номерлап сығыу, номер һуғыу

**ЗАНУМЕРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **занумерова́ть**

**ЗАНЫ́ТЬ** *сов.* **1.** һыҙлай (әрней) башлау; **больна́я нога́ заны́ла** ауыртҡан аяҡ һыҙлай башланы **2.** (*захныкать*) шыңшый (һуҡрана) башлау

**ЗАНЯ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **заня́ть** II 1—3, 6; **заня́тие го́рода** ҡаланы алыу **2.** эш, һөнәр; **род заня́тий** эш төрө; **выбира́ть себе́ заня́тие** үҙеңә һөнәр һайлау **3.** *мн.* **заня́тия** уҡыу(ҙар), дәрес(тәр); **в шко́лах начали́сь заня́тия** мәктәптәрҙә уҡыу башланды

**ЗАНЯ́ТНОСТЬ** *ж*; *разг.* ҡыҙыҡлыҡ; **заня́тность расска́за** хикәйәнең ҡыҙыҡлығы

**ЗАНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡыҙыҡ(лы), мауыҡтырғыс, күңелле; **заня́тное зре́лище** ҡыҙыҡ тамаша

**ЗАНЯТО́Й,** -ая, -ое эше күп (булған), эштән бушамаған, эшкә мәшғүл; **занято́й челове́к** эштән бушамаған кеше

**ЗА́НЯТОСТЬ** *ж* эш күплек, эштән бушамау, мәшғүллек; **ссыла́ться на за́нятость** эш күплеккә һылтаныу

**ЗА́НЯТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заня́ть** II; **2.** *прил. только кратк. ф.* (*несвободный*) бушамаған, буш булмаған, буш түгел; **я сего́дня за́нят** мин бөгөн буш түгел

**ЗАНЯ́ТЬ I** *сов. что* бурысҡа (үтескә) алыу, алып тороу; **заня́ть де́нег** аҡса алып тороу

**ЗАНЯ́ТЬ II** *сов.* **1.** *что* алыу, биләү, алып тороу, тултырыу; **кни́ги за́няли всю по́лку** китаптар тотош кәштәне тултырҙы **2.** алыу, биләү, урынлашыу; **заня́ть ме́сто** урын алыу; **заня́ть пе́рвое ме́сто в соревнова́нии** ярышта беренсе урын алыу **3.** *что* (*какую-л. должность*) булып эшләү; **заня́ть ме́сто секретаря́** секретарь булып эшләү **4.** (*продлиться*) ваҡыт(ты) алыу, барыу, дауам итеү; **сбо́ры за́няли оди́н час** йыйыныу бер сәғәт ваҡытты алды **5.** *кого-что* ҡыҙыҡһындырыу, мауыҡтырыу; **его́ заняла́ мысль о пое́здке в Москву́** уны Мәскәүгә барыу уйы ҡыҙыҡһындырҙы; **заня́ть разгово́рами** хәбәр менән мауыҡтырыу **6.** *что* алыу, яулап алыу; **заня́ть дере́вню** ауылды алыу; **заня́ть неприя́тельский го́род** дошман ҡалаһын алыу

**ЗАНЯ́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** *чем* шөғөлләнә (эшләй) башлау, тотоноу; **заня́ться рабо́той** эшкә тотоноу; **заня́ться спо́ртом** спорт менән шөғөлләнә башлау; **заня́ться литерату́рой** әҙәбиәт менән шөғөлләнә башлау **2.** *с кем-чем*; *разг.* булышлыҡ (ярҙам) итеү, шөғөлләнеү; **заня́ться с отстаю́щими ученика́ми** артта ҡалған уҡыусылар менән шөғөлләнеү **3.** *кем-чем* иғтибар итеү, ҡыҙыҡһыныу; **заня́ться свои́м здоро́вьем** һаулығыңа иғтибар итеү; **заня́ться газе́той** гәзит менән ҡыҙыҡһыныу

**ЗАНЯ́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** тоҡаныу, ҡабыныу, янып китеү; **дом заня́лся** өй янып китте **2.** таң ата башлау (һыҙылыу); **заря́ заняла́сь** таң ата башланы

**ЗАО́БЛАЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** болоттар өҫтөндәге, болоттарҙан юғары (бейек); **зао́блачные верши́ны** болоттарҙан юғары тау түбәләре **2.** *перен.* хыялый, буш; **зао́блачные мечты́** буш хыялдар

**ЗАОДНО́** *нареч.* **1.** (*вместе*) бергәләп, бер булып, берләшеп; **де́йствовать заодно́** *с кем-л.* *берәйһе менән* бергәләп эш итеү **2.** *разг.* (*попутно, кстати*) бер ыңғайҙа, бер рәттән, бер юлы; **купи́те заодно́ и кни́гу** бер ыңғайҙа китап та һатып алығыҙ

**ЗАОЗЁРНЫЙ,** -ая, -ое күл арьяғындағы; **заозёрное село́** күл арьяғындағы ауыл

**ЗАОКЕА́НСКИЙ,** -ая, -ое океан арьяғындағы; **заокеа́нские стра́ны** океан арьяғындағы илдәр

**ЗАОРА́ТЬ** *сов.*; *разг.* аҡырып ебәреү, ҡысҡыра башлау

**ЗАОСТРЁННОСТЬ** *ж* киҫкенлек, үткерлек; **полити́ческая заострённость выступле́ния** сығыштың сәйәси киҫкенлеге

**ЗАОСТРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заостри́ть 2.** *прил.* осло, ослайып торған; **заострённые верши́ны** осло түбәләр; **заострённый сук** осло ботаҡ

**ЗАОСТРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ослау, үткерләү; **заостри́ть каранда́ш** ҡәләмде ослау **2.** *перен.* киҫкенләштереү, көсәйтеү; **заостри́ть вопро́с** мәсьәләне киҫкенләштереү; **заостри́ть внима́ние** *на чём-л. нимәгәлер* иғтибарҙы көсәйтеү

**ЗАОСТРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ослайыу, ослайып ҡалыу; **его́ нос заостри́лся** уның танауы ослайып ҡалған **2.** *перен.* (*обостриться*) киҫкенләшеү, ҡырҡыулашыу; **вопро́с заостри́лся** мәсьәлә киҫкенләште

**ЗАОСТРЯ́ТЬ** *несов. см.* **заостри́ть**

**ЗАОСТРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заостри́ться 2.** *страд. от* **заостря́ть**

**ЗАО́ХАТЬ** *сов.*; *разг.* ах та ух итеү, ахылдай башлау

**ЗАО́ЧНИК** *м* и **ЗАО́ЧНИЦА** *ж* ситтән тороп уҡыусы

**ЗАО́ЧНО** *нареч.* **1.** үҙенән башҡа, үҙе юҡта; **хвали́ть зао́чно** үҙе юҡта маҡтау **2.** ситтән тороп; **учи́ться зао́чно** ситтән тороп уҡыу

**ЗАО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙе юҡта (үҙенән башҡа) булған; **зао́чный суд** үҙенән башҡа булған суд **2.** ситтән тороп ...ы; **зао́чное обуче́ние** ситтән тороп уҡыу; **зао́чное отделе́ние** ситтән тороп уҡыу бүлеге

**ЗАПА́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **запа́сть 2.** *прил.* (*впалый*) эскә батҡан; **запа́вшие щёки** эскә батҡан яңаҡтар

**ЗА́ПАД** *м* **1.** (*сторона света*) көнбайыш; **находи́ться к за́паду от моста́** күперҙән көнбайышта булыу **2.** (*Западная Европа*) Көнбайыш, Көнбайыш Европа илдәре

**ЗАПАДА́ТЬ** *несов. см.* **запа́сть**

**ЗА́ПАДНИК** *м* көнбайышсы (*көнбайышсылыҡты яҡлаусы*)

**ЗА́ПАДНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое көнбайышсылыҡ ...ы; **за́падническое движе́ние** көнбайышсылыҡ хәрәкәте

**ЗА́ПАДНИЧЕСТВО** *с* көнбайышсылыҡ (*XIX б. 40—50 йй. Рәсәйҙә барлыҡҡа килгән ижтимағи ағым*; *уның вәкилдәре, славянофилдарҙан айырмалы рәүештә, Көнбайыш Европаның капиталистик үҫеш юлы Рәсәй өсөн дә ярай тип һанай*)

**ЗА́ПАДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көнбайыш, көнбайыштан; **за́падный ве́тер** көнбайыштан иҫкән ел; **за́падная грани́ца** көнбайыш сик **2.** Көнбайыш ...ы; **за́падные стра́ны** Көнбайыш илдәре; **за́падная литерату́ра** Көнбайыш әҙәбиәте

**ЗАПАДНЯ́** *ж* **1.** ҡапҡан, тоҙаҡ, тәпе; **ста́вить западню́** ҡапҡан ҡороу **2.** *перен.* тоҙаҡ; **попа́сть в западню́** тоҙаҡҡа эләгеү

**ЗАПА́ЗДЫВАНИЕ** *с см.* **запа́здывать**

**ЗАПА́ЗДЫВАТЬ** *несов. см.* **запозда́ть**

**ЗАПА́ИВАТЬ** *несов. см.* **запая́ть**

**ЗАПА́ЙКА** *ж* **1.** ҡурғашлау, паятлап ямау (ҡурғаш иретеп бөтәштереү); **запа́йка самова́ра** самауырҙы ҡурғашлау **2.** ҡурғаш ялатылған, паятлаған урын

**ЗАПАКОВА́ТЬ** *сов. что* төрөп бәйләү, төргәкләү; **запакова́ть ве́щи** әйберҙәрҙе төрөп бәйләү

**ЗАПАКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **запакова́ть**

**ЗАПА́КОСТИТЬ** *сов. что*; *прост.* бысратып бөтөү, әшәкеләү; **запа́костить пол** иҙәнде бысратып бөтөү

**ЗАПА́Л I** *м* **1.** запал, тоҡандырғыс, ҡабыҙғыс; **оруди́йный запа́л** орудие запалы **2.** *разг.* дәрт, ҡабыныусанлыҡ

**ЗАПА́Л II** *м*; *спец.* яныу (*мал ауырыуы, гәҙәттә, аттарҙа*)

**ЗАПА́Л III** *м*; *с.-х.* көйөк (*игендең башаҡта көйөүе*)

**ЗАПА́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **запали́ть** I

**ЗАПА́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **запали́ть** II

**ЗАПА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов. см.* **запали́ться** I

**ЗАПА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов. см.* **запали́ться** II

**ЗАПАЛИ́ТЬ I** *сов. что*; *прост.* ут төртөү (һалыу), үртәү, үрт һалыу, яндырып (үртәп) ебәреү; **запали́ть соло́му** һаламға ут төртөү

**ЗАПАЛИ́ТЬ II** *сов. кого*; *прост.*, *спец.* атты яндырыу (*ныҡ ҡыуып йәки ҡыҙған көйө һыу эсереп*)

**ЗАПАЛИ́ТЬ III** *сов.*; *прост.* ата башлау, ут асыу

**ЗАПАЛИ́ТЬСЯ I** *сов.*; *прост.* тоҡаныу; **свеча́ запали́лась** шәм тоҡанды

**ЗАПАЛИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *прост.*, *спец.* яныу (*атҡа ҡарата*)

**ЗАПА́ЛЬНИК** *м* сыйғыс, һыҙма (*осҡон бирә торған ҡорал*)

**ЗАПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тоҡандырғыс; **запа́льный шнур** тоҡандырғыс бау

**ЗАПА́ЛЬЧИВОСТЬ** *ж* яндырайлыҡ, ҡыҙыулыҡ, ҡыҙыу ҡанлылыҡ; **изли́шняя запа́льчивость** артыҡ яндырайлыҡ; **наговори́ть ли́шнего в запа́льчивости** ҡыҙыулыҡ менән артығын әйтеп ташлау

**ЗАПА́ЛЬЧИВЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыу, яндырай, асыулы, ярһыу, ҡыҙыу ҡанлы; **запа́льчивый челове́к** ҡыҙыу кеше; **запа́льчивый отве́т** асыулы яуап

**ЗАПА́МЯТОВАТЬ** *сов. что*; *уст.*, *прост.* онотоп ебәреү, хәтерҙән сығарыу

**ЗАПАНИБРА́ТА** *нареч.*; *разг.* тартынмай-нитмәй, тартыныуһыҙ, үҙ кеше кеүек; **сходи́ться запанибра́та** тартынмай-нитмәй аралашыу

**ЗАПАНИБРА́ТСТВО** *с*; *разг.* тартынмау, әрһеҙлек; **допуска́ть запанибра́тство** әрһеҙлек күрһәтеү

**ЗАПА́РИВАНИЕ** *с см.* **запа́ривать**; **запа́ривание кормо́в** мал аҙығын бешекләү

**ЗАПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **запа́рить**

**ЗАПА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*обработать кипятком, паром*) парға тотоу, бешекләү, бешереү; **запа́рить о́труби** кәрпә бешекләү; **запа́рить шёлк** *тех.* ебәкте бешекләү **2.** *кого*; *прост.* (*в бане*) нык сабындырыу, хәлдән тайҙырғансы сабындырыу **3.** *кого*; *прост.* (*загнать*) ҡара тиргә төшөрөү, аҡ күбеккә батырыу (*атҡа ҡарата*)

**ЗАПА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* бүртеү, шешенеү; **бо́чка запа́рилась** мискә бүртенгән **2.** *прост.* (*в бане*) сабынып хәлдән тайыу, хәл бөткәнсе сабыныу **3.** *прост.* (*утомиться*) арып бөтөү, арып хәлдән тайыу

**ЗАПА́РКА I** *ж* **1.** (*обработка кипятком, паром*) бешекләү, парлау **2.** *спец.* (*приспособление*) бешекләгес

**ЗАПА́РКА II** *ж*; *прост.* (эш күплектән) тирләп бешеү

**ЗАПА́РНИК** *м*; *с.-х.* аҙыҡ парлағыс

**ЗАПАРШИ́ВЕТЬ** *сов.*; *разг.* таҙланыу, ҡорсаңғылау, таҙ төшөү

**ЗАПА́РЫВАТЬ** *сов. см.* **запоро́ть** I

**ЗАПА́С** *м* **1.** *в разн. знач.* запас, һаҡлам; **запа́с това́ров** тауар һаҡламы; **запа́сы не́фти** нефть һаҡламы; **золото́й запа́с** алтын һаҡламы; **шить с запа́сом** запас менән тегеү **2.** *воен.* запас (*хәрби хеҙмәттән ебәрелеп, ғәскәри иҫәпкә ҡуйылыу*); **лейтена́нт запа́са** запастағы лейтенант; **уво́лить в запа́с** запасҡа ебәреү ♦ **про запа́с** һаҡлыҡ өсөн, кәрәк була ҡалһа тип; **запа́с слов** һүҙ байлығы

**ЗАПАСА́ТЬ** *несов. см.* **запасти́**

**ЗАПАСА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запасти́сь** **2.** *страд. от* **запаса́ть**

**ЗАПА́СЛИВОСТЬ** *ж* һаҡсыллыҡ, хәстәрлелек; **запа́сливость хозя́йки** хужабикәнең хәстәрлелеге

**ЗАПА́СЛИВЫЙ,** -ая, -ое хәстәрле, хәстәрлекле, һаҡсыл; **запа́сливый хозя́ин** хәстәрлекле хужа

**ЗАПА́СНИК I** *м*; *разг.* запастағы ғәскәри хеҙмәткәр

**ЗАПА́СНИК II** *м* һаҡлағыс, һаҡлау урыны; **запа́сники музе́я** музейҙың һаҡлағыстары

**ЗАПАСНО́Й** и **ЗАПА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** запас, запас ...ы, һаҡлыҡ; **запасны́е ча́сти маши́ны** машинаның запас частары; **запасно́й игро́к** запас уйынсы **2.** *воен.* запастағы; **запасно́й кома́ндный соста́в** запастағы команда составы **3.** *в знач. сущ.* **запасно́й** *м*; *воен.* запаста тороусы, запастағы; **призы́в запасны́х** запастағыларҙы саҡырыу

**ЗАПАСТИ́** *сов. что*, *чего* әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу; **запасти́ дрова́ на́ зиму** ҡышҡа утын әҙерләп ҡуйыу

**ЗАПАСТИ́СЬ** *сов. чем* әҙерләп ҡуйыу, хәстәрләү; **запасти́сь проду́ктами** аҙыҡ-түлек әҙерләп ҡуйыу ♦ **запасти́сь терпе́нием** түҙемлек күрһәтеү (түҙеү)

**ЗАПА́СТЬ** *сов.* **1.** батыу, төпкә батыу (төшөү), эскә батыу; **глаза́ у него́ запа́ли** уның күҙҙәре эскә (төпкә) батҡан; **кла́виши запа́ли** баҫмаҡтар төпкә батҡан **2.** *разг.* төшөү, төшөп китеү; **моне́та запа́ла в проре́ху карма́на** аҡса кеҫә тишегенә төшөп китте **3.** *перен.* (*запечатлеться*) үтеп инеү, һеңеү; **слова́ его́ глубоко́ запа́ли мне в ду́шу** уның һүҙҙәре минең күңелемә үтеп инде **4.** *перен.* (*проникнуть*) үтеп инеү, төшөү; **в ко́мнату запа́л луч со́лнца** бүлмәгә ҡояш нуры төштө

**ЗАПАТЕНТОВА́ТЬ** *сов. что* патент алыу; **запатентова́ть изобрете́ние** уйлап тапҡан нәмәгә патент алыу

**ЗА́ПАХ** *м* еҫ; **прия́тный за́пах** хуш еҫ; **за́пах цвето́в** сәскә еҫе

**ЗАПАХА́ТЬ** *сов. что* **1.** һөрөп ташлау; **запаха́ть по́ле** яланды һөрөп ташлау **2.** *с.-х.* (*прикрыть землёй путём вспашки*) һөрөп күмдереү; **запаха́ть наво́з** тиреҫте һөрөп күмдереү

**ЗАПА́ХИВАТЬ I** *несов. см.* **запаха́ть**

**ЗАПА́ХИВАТЬ II** *несов. см.* **запахну́ть**

**ЗАПА́ХИВАТЬСЯ I** *несов. см.* **запа́хивать** I

**ЗАПА́ХИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **запахну́ться** **2.** *страд. от* **запа́хивать** II

**ЗАПА́ХНУТЬ** *сов.* еҫ килеү, еҫ сыға башлау; **запа́хло ды́мом** төтөн еҫе килә башланы

**ЗАПАХНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** сабыуҙы ҡаплау (ябыу), ҡаплап (ябып) ҡуйыу; **запахну́ть шу́бу** тун сабыуын ҡаплау **2.** *разг.* (*задёрнуть*) төшөрөү, тартып (ҡороп) ҡуйыу; **запахну́ть занаве́ску** ҡорманы тартып ҡуйыу

**ЗАПАХНУ́ТЬСЯ** *сов.* төрөнөү, ураныу; **запахну́ться в хала́т** халатҡа төрөнөү

**ЗАПА́ЧКАТЬ** *сов. кого-что* **1.** буяу, бысратыу, ҡарайтыу; **запа́чкать костю́м черни́лами** костюмды ҡара менән бысратыу **2.** *перен.*, *разг.* (*опозорить*) (исеменә) тап төшөрөү, ҡара яғыу, бысратыу; **запа́чкать до́брое и́мя** (яҡшы) исемгә тап төшөрөү

**ЗАПА́ЧКАТЬСЯ** *сов.* бысраныу, буялыу; **запа́чкаться гря́зью** батҡаҡҡа буялыу

**ЗАПА́ШКА** *ж*; *с.-х.* **1.** һөрөү; **тра́кторная запа́шка** трактор менән һөрөү **2.** һөрөлгән ерҙең күләме

**ЗАПА́ШНИК** *м*; *с.-х.* запашник (*һай һөрә торған һабан*)

**ЗАПАЯ́ТЬ** *сов. что* ҡурғашлау, ҡурғаш ялатыу, паятлау, паятлап ямау; **запая́ть кастрю́лю** кәстрүлде ҡурғашлап ямау

**ЗАПЕ́В** *м* **1.** йыр башы (*күмәк йырҙа яңғыҙ башҡарыла торған өлөш*) **2.** (*зачин*) кереш, әҫәрҙең башы

**ЗАПЕВА́ЛА** *м* и *ж* башлап йырлаусы (*күмәк йырҙа*)

**ЗАПЕВА́ТЬ** *несов. что* и *без. доп.* башлап йырлау, йыр башлау

**ЗАПЕ́ВКА** *ж см.* **запе́в**

**ЗАПЕКА́НКА** *ж* запеканка (**1.** *ярманан, иҙелгән картуфтан, эремсектән ҡыҙҙырып бешерелгән ашамлыҡ* **2.** *еләк-емеш, тәм-том шарабы*)

**ЗАПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **запе́чь**

**ЗАПЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запе́чься** **2.** *страд. от* **запека́ть**

**ЗАПЕЛЕНА́ТЬ** *сов. кого-что* биләп ҡуйыу, биләүгә урау; **запелена́ть ребёнка** баланы биләп ҡуйыу

**ЗАПЕЛЕНГОВА́ТЬ** *сов. что*; *спец.* тотоу, урынын билдәләү, пеленгылау (*радиостанцияны*)

**ЗАПЕ́НИТЬ** *сов. что* күбекләндереү

**ЗАПЕ́НИТЬСЯ** *сов.* күбекләнеү, күбекләнә башлау; **вино́ запе́нилось** шарап күбекләнә башланы

**ЗАПЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* бикләү, бикләп ҡуйыу; **запере́ть ко́мнату** бүлмәне бикләү **2.** *кого-что* ябып (бикләп) ҡуйыу; **запере́ть ко́шку в чула́не** бесәйҙе соланға бикләп ҡуйыу **3.** *кого-что*; *перен.* ҡамап алыу, юлын бикләү; **запере́ть флот неприя́теля** дошман флотын ҡамап алыу

**ЗАПЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* бикләнеү, бикләнеп алыу; **запере́ться в ко́мнате** бүлмәлә бикләнеү; **дверь заперла́сь** ишек бикләнде

**ЗАПЕРШИ́ТЬ** *сов. безл.*; *разг.* ҡымырйытыу, әсетеү; **у меня́ запершИ́ло в го́рле** тамағымды ҡымырйыта

**ЗАПЕСТРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*о чём-л. пёстром*) сыбарланып күренеү; **пе́ред глаза́ми запестре́ли поля́** күҙгә сыбарланып баҫыуҙар күренә башланы **2.** йыш күренә башлау (осрау); **его́ и́мя запестре́ло в газе́тах** уның исеме гәзиттәрҙә йыш күренә башланы

**ЗАПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** йырлап ебәреү, йырлай башлау **2.** (*о птицах*) һайрап ебәреү, һайрай башлау; (*о петухе*) ҡысҡырып ебәреү, ҡысҡыра башлау

**ЗАПЕЧА́ЛИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* моңһоуланыу, күңелһеҙләнеү, бойоғоп китеү

**ЗАПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* **1.** мисәтләп ҡуйыу, мисәтләү; **запеча́тать конве́рт** конвертты мисәтләү; **запеча́тать кварти́ру** фатирҙы мисәтләп ҡуйыу **2.** йәбештереп ҡуйыу, йәбештереү; **запеча́тать письмо́** хатты йәбештереү

**ЗАПЕЧАТЛЕВА́ТЬ** *несов. см.* **запечатле́ть**

**ЗАПЕЧАТЛЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запечатле́ться** **2.** *страд. от* **запечатлева́ть**

**ЗАПЕЧАТЛЕ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** кәүҙәләндереү; **запечатле́ть на карти́не** *кого-л. берәйһен* картинала кәүҙәләндереү **2.** күңелдә (иҫтә) ҡалдырыу, күңелгә алыу; **запечатле́ть собы́тия в па́мяти** ваҡиғаларҙы күңелдә ҡалдырыу

**ЗАПЕЧАТЛЕ́ТЬСЯ** *сов.* күңелгә һеңеп ҡалыу, иҫтә ҡалыу, тәрән эҙ ҡалдырыу; **па́мять о ма́тери запечатле́лась в его́ душе́** әсәһе тураһындағы иҫтәлек уның күңеленә һеңеп ҡалды

**ЗАПЕЧА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **запеча́тать**

**ЗАПЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** (*испечь в тесте*) ҡамырға төрөп бешереү; **запе́чь я́блоко в те́сте** алманы ҡамырға төрөп бешереү **2.** ҡурыу, ҡыҙҙырыу; **запе́чь макаро́ны** макарон ҡыҙҙырыу

**ЗАПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** ҡурылып (ҡыҙарып) бешеү; **карто́шка запекла́сь** картуф ҡыҙарып бешкән **2.** (*о крови*) ойошоу, ҡатыу **3.** (*о губах*) кибеү, ярылыу

**ЗАПИВА́ТЬ I** *несов. см.* **запи́ть** I

**ЗАПИВА́ТЬ II** *несов.*; *разг.* эскегә һабышыу, өҙлөкһөҙ эсеү

**ЗАПИЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *спец.* (бер аҙ) бысып ҡуйыу; **запили́ть до́ску** таҡтаны бер аҙ бысып ҡуйыу **2.** *кого*; *разг.* бәйләнеп (мыжып) йонсотоу

**ЗАПИНА́ТЬСЯ** *сов. см.* **запну́ться**

**ЗАПИ́НКА** *ж* тотлоғоу; **говори́ть без запи́нки** тотлоҡмай һөйләү

**ЗАПИРА́ТЕЛЬСТВО** *с* ғәйепте танымау, ғәйепте инҡар итеү

**ЗАПИРА́ТЬ** *несов. см.* **запере́ть**

**ЗАПИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запере́ться** **2.** *страд. от* **запира́ть**

**ЗАПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* яҙыу, яҙып алыу (ҡуйыу, барыу); **записа́ть ле́кцию** лекцияны яҙып алыу; **записа́ть а́дрес** адресты яҙып ҡуйыу; **записа́ть речь на магнитофо́н** телмәрҙе магнитофонға яҙып алыу **2.** *кого-что* яҙып (теркәп) ҡуйыу, яҙыу, теркәү; **записа́ть на приём** ҡабул итеү исемлегенә яҙып ҡуйыу; **записа́ть в о́чередь** сиратҡа яҙыу

**ЗАПИСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яҙылыу; **записа́ться в библиоте́ку** китапханаға яҙылыу; **записа́ться на приём к врачу́** табипҡа инергә яҙылыу **2.** *прост.* никах теркәү, яҙылышыу; **записа́ться во Дворце́ бракосочета́ний** Никах һарайында яҙылышыу

**ЗАПИ́СКА** *ж* **1.** яҙыу, яҙыулы ҡағыҙ, ҡулхат; **служе́бная запи́ска** рәсми яҙыу; **объясни́тельная запи́ска** аңлатмалы яҙыу; **отпра́вить запи́ску** яҙыу (ҡулхат) ебәреү **2.** *мн.* **запи́ски** яҙмалар; **учёные запи́ски** ғилми яҙмалар; **путевы́е запи́ски** юл яҙмалары **3.** *мн.* **запи́ски** (*в названии научных изданий*) хәтирәләр, иҫтәлектәр

**ЗАПИСНО́Й,** -ая, -ое яҙыу ...ы; **записна́я кни́жка** яҙыу дәфтәре, ҡуйын дәфтәре

**ЗАПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **записа́ть**

**ЗАПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **записа́ться** **2.** *страд. от* **запи́сывать**

**ЗА́ПИСЬ** *ж* **1.** яҙып алыу, яҙыу; **за́пись в шко́лу** мәктәпкә яҙыу; **за́пись на плёнку** плёнкаға яҙыу **2.** яҙма, яҙыу; **за́пись ле́кции** лекция яҙмаһы; **тетра́дь с за́писями** яҙыулы дәфтәр

**ЗАПИ́ТЬ I** *сов. что, чем* (артынан) эсеп ебәреү (ҡуйыу); **запи́ть лека́рство водо́й** дарыу артынан һыу эсеп ебәреү

**ЗАПИ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* туҡтауһыҙ эсеү, эскегә һабышыу

**ЗАПИХА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тыңҡыслап (тығыҙлап) тултырыу, тығыу; **запиха́ть бума́ги в стол** ҡағыҙҙарҙы өҫтәл тартмаһына тыңҡыслап тултырыу

**ЗАПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **запиха́ть** и **запихну́ть**

**ЗАПИХНУ́ТЬ** *сов. см.* **запиха́ть**

**ЗАПЛА́КАННЫЙ,** -ая, -ое йәшле, илаған; **запла́канные глаза́** йәшле күҙҙәр

**ЗАПЛА́КАТЬ** *сов.* илап ебәреү, илай башлау; **запла́кать от оби́ды** ғәрлектән илап ебәреү

**ЗАПЛАНИ́РОВАТЬ** *сов. что* планлаштырыу, планлаштырып ҡуйыу; **заплани́ровать пое́здку** юлға (сәфәргә) сығыуҙы планлаштырыу

**ЗАПЛА́ТА** *ж* ямаулыҡ, ямау; **наложи́ть запла́ту** ямау һалыу

**ЗАПЛАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* түләү; **заплати́ть за това́р** тауар өсөн түләү **2.** *чем* ҡайтарыу, түләү; **заплати́ть за добро́ добро́м** яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән ҡайтарыу ♦ **заплати́ть голово́й** баш менән яуап биреү

**ЗАПЛА́ТКА** *ж*; *уменьш. от* **запла́та**

**ЗАПЛА́ЧКА** *ж* (*свадебный обряд*) сеңләү

**ЗАПЛЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* төкөрөп бысратыу, төкөрөп бөтөү (тултырыу); **заплева́ть пол** иҙәнгә төкөрөп бөтөү **2.** *что* төкөрөп һүндереү (*тәмәке төпсөгөн*)

**ЗАПЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **заплева́ть**

**ЗАПЛЕСКА́ТЬ** *сов. кого-что* сәпсеү, сәсрәтеп бөтөү, сәсрәтеп еүешләү, сайпылтыу, сайпылдырыу; **заплеска́ть пол водо́й** иҙәнгә һыу сәсрәтеп бөтөү

**ЗАПЛЕСКА́ТЬСЯ** *сов.* сәсрәй башлау, сайпылып китеү

**ЗАПЛЕ́СНЕВЕЛЫЙ** и **ЗАПЛЕСНЕВЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое күгәргән; **запле́сневелый хлеб** күгәргән икмәк

**ЗАПЛЕ́СНЕВЕТЬ** *сов.* күгәреү, үңәҙләнеү; **бу́лка запле́сневела** ҡалас күгәргән

**ЗАПЛЕ́СНЕТЬ** *сов.*; *разг. см.* **запле́сневеть**

**ЗАПЛЕСНУ́ТЬ** *сов. кого-что* (һыу) сәсрәү, тулыу, һирпелеү; **волна́ заплесну́ла ло́дку** тулҡын кәмәгә һирпелде

**ЗАПЛЕСТИ́** *сов. что* **1.** үреү, үреп ҡуйыу; **заплести́ во́лосы** сәсте үреп ҡуйыу **2.** (*оплести, покрыть чем-л. вьющимся*) сырмап алыу, үреп ҡаплау

**ЗАПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **заплести́**

**ЗАПЛЕТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** саҡ-саҡ (тәнтерәкләп) атлау, көскә баҫыу (атлау); **но́ги заплета́ются от уста́лости** арыуҙан аяҡтар көскә атлай **2.** бәйләнеү, көрмәлеү; **у него́ от волне́ния язы́к стал заплета́ться** тулҡынланыуҙан (уның) теле көрмәлә башланы **3.** *страд. от* **заплета́ть**

**ЗАПЛЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое арҡа ...ы, артмаҡ, биштәр; **запле́чный мешо́к** арҡа тоғо

**ЗАПЛЕ́ЧЬЕ** *с*; *прост.* **1.** елкә тамыры **2.** елкәлек (*йөксөләрҙең йөк ташығанда елкәһенә ҡуя торған ҡулайлама*)

**ЗАПЛОМБИРОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*положить пломбу*) пломбалау, пломба ҡуйыу (ҡуйҙырыу), яматыу; **запломбирова́ть зуб** тешкә пломба ҡуйыу **2.** (*запечатать пломбой*) пломбалау, пломба һалыу; **запломбирова́ть ваго́н** вагонды пломбалау

**ЗАПЛОМБИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **запломбирова́ть**

**ЗАПЛУТА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* аҙашыу, юлдан яҙыу; **заплута́ться в лесу́** урманда аҙашыу

**ЗАПЛЫ́В** *м*; *спорт.* йөҙөү, йөҙөш (*йөҙөү буйынса ярыш*); **заплы́в на коро́ткую диста́нцию** яҡын араға йөҙөш

**ЗАПЛЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **заплы́ть** I

**ЗАПЛЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **заплы́ть** II

**ЗАПЛЫ́ТЬ I** *сов.* (йыраҡҡа) йөҙөп китеү, йөҙөп барып сығыу; **заплы́ть на середи́ну реки́** йылға уртаһына йөҙөп китеү

**ЗАПЛЫ́ТЬ II** *сов.* **1.** (*наполниться, покрыться чем-л. текучим*) эркелеп (ташып, иреп) ағыу; **свеча́ заплыла́** май шәм иреп аҡты **2.** (*покрыться жиром, отёками*) ҡаплау, баҫыу, ҡыҫылыу, бөрөләү; **глаза́ заплы́ли** күҙҙәрен май баҫҡан

**ЗАПЛЯСА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* бейергә төшөү, бейей башлау

**ЗАПНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** абыныу, һөрөнөү; **запну́ться за поро́г** тупһаға һөрөнөү **2.** *перен.* тотлоғоу, тотлоғоп (туҡталып) ҡалыу; **запну́ться на пе́рвом сло́ве** беренсе һүҙҙә үк тотлоғоп ҡалыу

**ЗАПОВЕ́ДНИК** *м* заповедник, ҡурсаулыҡ (*тирә-яҡ мөхитте тәбиғи хәлендә һаҡлай торған урын*); **Башки́рский запове́дник** Башҡорт ҡурсаулығы

**ЗАПОВЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыйылған, тейелмәй торған; **запове́дный лес** тейелмәй торған урман **2.** сер итеп һаҡланған, йәшерен; **запове́дные мы́сли** йәшерен уйҙар

**ЗА́ПОВЕДЬ** *ж* **1.** дини ҡанун, дин ҡушыуы **2.** *перен.*, *высок.* васыят, бурыс

**ЗАПОДЛИЦО́** *нареч.*; *спец.* тигеҙ итеп, бер кимәлдә; **сде́лать поро́г заподлицо́ с по́лом** тупһаны иҙән менән бер кимәлдә яһау

**ЗАПОДО́ЗРИВАТЬ** *несов. см.* **заподо́зрить**

**ЗАПОДО́ЗРИТЬ** *сов. кого-что*, *в чём* шикләнә башлау, шикләнеү, шик төшөү, (кемдәндер) күреү; **заподо́зрить во лжи** алдаша тип шикләнеү

**ЗАПО́ЕМ** *нареч.*; *разг.* **1.** туҡтауһыҙ, бер туҡтамай, тыйыла алмай; **пить запо́ем** туҡтауһыҙ эсеү **2.** *перен.* баш күтәрмәй(енсә), тын да алмай, йотолоп; **чита́ть запо́ем** баш күтәрмәйенсә уҡыу

**ЗАПОЗДА́ЛЫЙ,** -ая, -ое һуңлаған, һуңға ҡалған, кисеккән; **запозда́лая по́мощь** һуңлаған ярҙам; **запозда́лый пу́тник** һуңға ҡалған юлаусы

**ЗАПОЗДА́НИЕ** *с* һуңлау, һуңға ҡалыу, кисегеү; **прийти́ с больши́м запозда́нием** бик күпкә һуңлап килеү

**ЗАПОЗДА́ТЬ** *сов.* һуңлау, һуңға ҡалыу; **запозда́ть с по́мощью** ярҙам итергә һуңға ҡалыу; **по́езд запозда́л** поезд һуңланы

**ЗАПОЙ́ТЬ** *сов. кого*; *прост.* күп эсереү, артыҡ эсереү; **запои́ть ло́шадь** атты артыҡ эсереү

**ЗАПО́Й** *м* эскелек сире, өҙлөкһөҙ эсеү; **страда́ть запо́ями** эскелек менән сирләү

**ЗАПОЛА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **заполоска́ть**

**ЗАПО́ЛЗАТЬ** *сов.* шыуыша (үрмәләй, имгәкләй) башлау, шыуышып (имгәкләп, үрмәләп) йөрөп китеү; **ребёнок запо́лзал по́ полу** бала иҙәндә шыуыша башланы

**ЗАПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **заползти́**

**ЗАПОЛЗТИ́** *сов.* үрмәләп (шыуышып, имгәкләп) инеү, шыуышып инеп китеү; **заползти́ под дива́н** диван аҫтына шыуышып инеү

**ЗАПОЛНЕ́НИЕ** *с см.* **запо́лнить**, **заполня́ть**; **заполне́ние анке́ты** анкета тултырыу

**ЗАПОЛНИ́ТЕЛЬ** *м*; *спец.* (ҡом) ҡатышма (*бетонға, мастикаға һ.б. тығыҙлыҡ өсөн өҫтәлә торған матдә*); **заполни́тель для бето́на** бетондың ҡом ҡатышмаһы

**ЗАПО́ЛНИТЬ** *сов. что* **1.** (шығырым) тулы, килеп тулыу; **зри́тели запо́лнили зал** тамашасылар залға килеп тулды **2.** тултырыу; **запо́лнить табли́цу** таблица тултырыу

**ЗАПО́ЛНИТЬСЯ** *сов.* тулыу, шығырым тулыу; **пло́щадь запо́лнилась наро́дом** майҙан халыҡ менән тулды

**ЗАПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **запо́лнить**

**ЗАПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запо́лниться** **2.** *страд. от* **заполня́ть**

**ЗАПОЛОНИ́ТЬ** *сов.*; *в разн. знач.* әсир итеү; **заполони́ть в бою́ офице́ра** һуғышта офицерҙы әсир итеү; **заполони́ть ду́шу** күңелде әсир итеү

**ЗАПОЛОСКА́ТЬ** *сов. что* сайҡау; **заполоска́ть пелёнку** йүргәкте сайҡау

**ЗАПОЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **заполучи́ть**

**ЗАПОЛУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* алыу, табып алыу, эләктереү, ҡулға төшөрөү; **заполучи́ть хоро́шего рабо́тника** яҡшы хеҙмәткәрҙе табып алыу

**ЗАПОЛЫХА́ТЬ** *сов.*; *разг.* дөрләп янып китеү, ялҡынланып яна башлау; **дом заполыха́л** өй дөрләп янып китте

**ЗАПОЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое Поляр түңәрәге арьяғындағы; **заполя́рный го́род** Поляр түңәрәге арьяғындағы ҡала

**ЗАПОЛЯ́РЬЕ** *с* Поляр түңәрәгенең арьяғы

**ЗАПОМИНА́НИЕ** *с см.* **запомина́ть**; **механи́ческое запомина́ние** механик рәүештә иҫләү, асылына төшөнмәй хәтерҙә ҡалдырыу

**ЗАПОМИНА́ТЬ** *несов. см.* **запо́мнить**

**ЗАПОМИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запо́мниться** **2.** *страд. от* **запомина́ть**

**ЗАПО́МНИТЬ** *сов. кого-что* хәтерҙә (иҫтә) ҡалдырыу, күңелгә һалыу; **запо́мнить стихи́** шиғырҙарҙы хәтерҙә ҡалдырыу

**ЗАПО́МНИТЬСЯ** *сов.* хәтерҙә (иҫтә) ҡалыу; **запо́мниться на всю жизнь** ғүмергә иҫтә ҡалыу

**ЗА́ПОНКА** *ж* ҡаптырма (*яғаға, еңгә ҡуйыла*); **золота́я за́понка** алтын ҡаптырма

**ЗАПО́Р I** *м* бик, келә, элгес; **дверь с запо́ром** келәле ишек

**ЗАПО́Р II** *м* эс ҡатыу, ҡаталау, ҡаталаҡ; **страда́ть запо́ром** ҡаталау менән интегеү

**ЗАПОРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **запороши́ть**

**ЗАПОРО́ЖЕЦ** *м*; *ист.* Запорожье казагы

**ЗАПОРО́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.* ҡамсылау, үлтергәнсе туҡмау, ярып (һуҡтырып) үлтереү

**ЗАПОРО́ТЬ II** *сов. что*; *прост.* (насар эшләп) боҙоу, эштән сығарыу; **запоро́ть дета́ль** деталде боҙоу

**ЗАПОРОШИ́ТЬ** *сов.* **1.** (һибәләп, яуып) ҡаплау, яуа башлау; **доро́гу запороши́ло сне́гом** юлды ҡырпаҡ ҡар ҡапланы; **2.** *прост.* ҡом (туҙан, сүп) инеү (*күҙгә, ҡолаҡҡа ҡарата*); **ему́ запороши́ло глаза́** күҙенә туҙан ингән

**ЗАПОРОШИ́ТЬСЯ** *сов. чем* ҡапланыу, ябылыу; **запороши́ться сне́гом** ҡырпаҡ ҡар менән ҡапланыу; **запороши́ться муко́й** онланыу, он менән ҡапланыу

**ЗАПОТЕВА́ТЬ** *несов. см.* **запоте́ть**

**ЗАПОТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** парланған, быуланған; **запоте́лое стекло́** быуланған быяла **2.** *прост.* тирләгән; **запоте́лая ло́шадь** тирләгән ат

**ЗАПОТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** парланыу, быуланыу; **о́кна запоте́ли** тәҙрәләр быуланды **2.** *прост.* тирләү, тир сығыу; **его́ лоб запоте́л** уның маңлайына тир сыҡты

**ЗАПОЯ́САТЬ** *сов. кого*; *прост.* билде быуыу; **запоя́сать ма́льчика** малайҙың билен быуыу

**ЗАПОЯ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **запоя́сать**

**ЗАПРАВИ́ЛА** *м*; *разг.* етәксе, башлыҡ, башлап йөрөүсе

**ЗАПРА́ВИТЬ** *сов. что* **1.** тығып ҡуйыу, ҡыҫтырыу, индереү; **запра́вить брю́ки в сапоги́** салбар балағын итек ҡунысына ҡыҫтырыу **2.** *чем* ҡатыҡлау, һалыу, ҡушыу; **запра́вить суп смета́ной** ашҡа ҡаймаҡ һалыу **3.** ҡойоу, ҡойҙороу, һалыу, заправкалау; **запра́вить автомоби́ль бензи́ном** автомобилгә бензин ҡойоу ♦ **запра́вить ко́йку (крова́ть)** карауатты йыйыштырыу

**ЗАПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* яғыулыҡ ҡойоу (һалыу), заправкаланыу; **запра́виться бензи́ном** (машинаға) бензин ҡойоу **2.** *прост.*, *шутл.* туйғансы ашап-эсеү; **хорошо́ запра́виться на доро́гу** юлға туйғансы ашап-эсеп алыу

**ЗАПРА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **запра́вить**, **запра́виться** **2.** тәмләткес (*ҡатыҡ, ҡорот, соус һ.б.*); **запра́вка для су́па** һурпа тәмләткес

**ЗАПРАВЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **запра́вить** **2.** *обычно чем*; *прост.* алып барыу, башҡарыу; **заправля́ть всем до́мом** өйҙәге бөтә эште алып барыу

**ЗАПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запра́виться** **2.** *страд. от* **заправля́ть** 1

**ЗАПРА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое яғыулыҡ (янармай) ҡойоу ...ы, май-яғыулыҡ ...ы, заправкалай торған, заправкалау ...ы; **запра́вочная ста́нция** май-яғыулыҡ станцияһы

**ЗАПРА́ВСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* бына тигән, бик шәп; **запра́вский ма́стер** бына тигән оҫта

**ЗАПРА́ВЩИК** *м* заправкалаусы, яғыулыҡ ҡойоусы

**ЗАПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **запроси́ть**

**ЗАПРЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иң аҙаҡҡы, иң һуңғы; **запреде́льный срок** иң һуңғы срок (ваҡыт)

**ЗАПРЕССОВА́ТЬ** *сов. что* преслау, ҡыҫыу, тығыҙлау; **запрессова́ть се́но** бесән преслау

**ЗАПРЕ́Т** *м* тыйыу; **наложи́ть запре́т** *на что* *нимәнелер* эшләүҙе тыйыу; **без запре́та** тыйыуһыҙ ♦ **находи́ться (быть) под запре́том** тыйылған булыу

**ЗАПРЕТИ́ТЬ** *сов. кому, что* и *с неопр.* тыйыу, рөхсәт итмәү; **запрети́ть кури́ть** тәмәке тартыуҙы тыйыу

**ЗАПРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое тыйылған, ябыҡ; **запре́тная зо́на** ябыҡ зона ♦ **запре́тный плод** ымһындырғыс нәмә

**ЗАПРЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **запрети́ть**

**ЗАПРЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тыйылыу, рөхсәт ителмәү; **ходи́ть по газо́нам запреща́ется** газон буйлап йөрөү тыйыла **2.** *страд. от* **запреща́ть**

**ЗАПРЕЩЕ́НИЕ** *с см.* **запрети́ть — запреща́ть**; **запреще́ние произво́дства я́дерного ору́жия** ядро ҡоралын етештереүҙе тыйыу

**ЗАПРЕЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **запрети́ть 2.** *прил.* тыйылған, ярамаған; **запрещённая кни́га** тыйылған китап

**ЗАПРИМЕ́ТИТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* күреү, күреп ҡалыу (алыу), иҫтә ҡалдырыу; **запримéтить знако́мого в толпе́** халыҡ араһында танышыңды күреп ҡалыу

**ЗАПРИХО́ДОВАТЬ** *сов. что* керемгә индереү, керемгә яҙып ҡуйыу

**ЗАПРОГРАММИ́РОВАТЬ** *сов. что* **1.** программаға һалыу, программа төҙөү (*хисаплау машинаһы өсөн*) **2.** *перен.* планлаштырыу, планлаштырып ҡуйыу; **запрограмми́ровать свои́ де́йствия** үҙ эшеңде планлаштырып ҡуйыу

**ЗАПРОДАВА́ТЬ** *несов. см.* **запрода́ть**

**ЗАПРОДА́ТЬ** *сов. кого-что* алдан һатыу (һатып ҡуйыу)

**ЗАПРОЕКТИ́РОВАТЬ** *сов. что* проектлаштырыу, проектҡа (планға) индереү; **запроекти́ровать строи́тельство электроста́нции** электростанция төҙөүҙе проектлаштырыу

**ЗАПРОКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **запроки́нуть**

**ЗАПРОКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запроки́нуться 2.** *страд. от* **запроки́дывать**

**ЗАПРОКИ́НУТЬ** *сов. что*; *разг.* артҡа ташлау (һалыу); **запроки́нуть го́лову** башты артҡа ташлау

**ЗАПРОКИ́НУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* артҡа кирелеү, ҡайтарылыу, ҡайҡайыу; **голова́ запроки́нулась** башы ҡайҡайған

**ЗАПРОПАСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* әллә ҡайҙа китеү, юғалыу, юҡ булыу, олағыу; **куда́ он запропасти́лся?** ҡайҙа юғалды ул?

**ЗАПРОПА́СТЬ** *сов. см.* **запропасти́ться**

**ЗАПРО́С** *м* **1.** *офиц.* һорау, һоратыу, запрос; **сде́лать запро́с** запрос яһау; **посла́ть запро́с в учрежде́ние** учреждениеға һорау ебәреү **2.** *обычно мн.* **запро́сы** ихтыяждар, талаптар; **культу́рные запро́сы** мәҙәни ихтыяждар **3.** *разг.* (*назначение чрезмерной цены*) артыҡ хаҡ һорау, ҙур хаҡ ҡуйыу

**ЗАПРОСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *офиц.* һорау, һоратыу, һоратып алыу (алдырыу); **запроси́ть спра́вку** белешмә һоратып алдырыу **2.** *что* (*назначить чрезмерно высокую цену*) артыҡ (ҙур) хаҡ ҡуйыу (һорау)

**ЗА́ПРОСТО** *нареч.*; *разг.* **1.** тартынмай-нитмәй, тиң күреп; **за́просто приходи́ть в го́сти** тартынмай-нитмәй ҡунаҡҡа килеү **2.** еңелсә, (артыҡ) көсәнмәй; **за́просто подня́ть мешо́к муки́** бер тоҡ онды көсәнмәй генә күтәреү

**ЗАПРОТЕСТОВА́ТЬ** *сов.* протест белдереү, ҡырҡа ҡаршы сығыу

**ЗАПРОТОКОЛИ́РОВАТЬ** *сов. что* протоколға индереү, протоколға теркәү

**ЗАПРУ́ДА** *ж* быуа; **прорва́ть запру́ду** быуаны йырыу

**ЗАПРУДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** быуыу, быуып ҡуйыу; **запруди́ть ре́ку** йылғаны быуып ҡуйыу **2.** *перен.* тултырыу, ҡаплап алыу; **наро́д запруди́л всю пло́щадь** халыҡ тотош майҙанды тултырҙы

**ЗАПРУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **запруди́ть**

**ЗАПРЫ́ГАТЬ** *сов.* һикерә (ырғый, һикергеләй) башлау; **запры́гать от ра́дости** шатлыҡтан һикергеләй башлау

**ЗАПРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **запры́гнуть**

**ЗАПРЫ́ГНУТЬ** *сов.*; *разг.* һикереп менеү, һикереү; **ко́шка запры́гнула на дива́н** бесәй диванға һикереп менде

**ЗАПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **запря́чь**

**ЗАПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запря́чься 2.** *страд. от* **запряга́ть**

**ЗАПРЯ́ЖКА** *ж* **1.** *см.* **запря́чь — запряга́ть**; **запря́жка цу́гом** (аттарҙы) бер-бер артлы теҙеп егеү **2.** (*повозка, экипаж*) егеүле ат **3.** (*сбруя*) ҡамыт-дуға

**ЗАПРЯ́ТАТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* йәшереү, йәшереп (йыйып) ҡуйыу; **запря́тать кни́гу** китапты йәшереп ҡуйыу **2.** *прост.* алып барып тығыу (ябыу), бикләп ҡуйыу (*төрмәгә һ.б.*)

**ЗАПРЯ́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йәшеренеү, йәшенеү, ҡасыу, боҫоу

**ЗАПРЯ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **запря́тать**

**ЗАПРЯ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запря́таться 2.** *страд. от* **запря́тывать**

**ЗАПРЯ́ЧЬ** *сов. кого-что* **1.** егеү; **запря́чь ло́шадь** ат егеү; **2.** *перен.*, *разг.* егеү; **запря́чь в рабо́ту** эшкә егеү

**ЗАПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.*; *разг.* егелеү; **запря́чься в рабо́ту** эшкә егелеү

**ЗАПУ́ГАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **запуга́ть 2.** *прил.* ҡурҡынған, ҡурҡаҡ, ҡурҡып бөткән, ҡото алынған; **запу́ганный ребёнок** ҡурҡаҡ бала

**ЗАПУГА́ТЬ** *сов. кого-что* ҡурҡытыу, ҡурҡытып бөтөү, ҡотон алыу, өркөтөү; **запуга́ть угро́зами** янап ҡурҡытыу

**ЗАПУ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **запуга́ть**

**ЗАПУ́ДРИВАТЬ** *несов. см.* **запу́дрить**

**ЗАПУ́ДРИТЬ** *сов. что* пудра һөртөү, кершән яғыу; **запу́дрить лицо́** биткә пудра һөртөү

**ЗА́ПУСК** *м см.* **запусти́ть** I 2, 3, 5, 6; **за́пуск раке́ты** ракета осороу

**ЗАПУСКА́ТЬ I** *несов. см.* **запусти́ть** I

**ЗАПУСКА́ТЬ II** *несов. см.* **запусти́ть** II

**ЗАПУСТЕ́НИЕ** *с см.* **запусте́ть**; **дом в запусте́нии** йорт ташландыҡ хәлдә

**ЗАПУСТЕ́ТЬ** *сов.* ташландыҡ хәлгә килеү (төшөү), бушап ҡалыу; **сад запусте́л** баҡса ташландыҡ хәлгә килгән

**ЗАПУСТИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что, чем*; *разг.* ырғытыу, бәреү, ебәреү; **запусти́ть ка́мень (ка́мнем)** таш менән ебәреү **2.** *что* осороу, ебәреү; **запусти́ть раке́ту** ракета осороу; **запусти́ть зме́я** ҡағыҙ осорғос осороу **3.** *что*; *разг.* эшләтеп ебәреү, эшләтә башлау, тоҡандырыу; **запусти́ть мото́р** моторҙы эшләтеп ебәреү **4.** *что*; *разг.* тығыу, тығып ебәреү; **запусти́ть ру́ку в карма́н** ҡулды кеҫәгә тығыу **5.** *что*; *разг.* батырыу, ҡаҙау; **запусти́ть ко́гти** тырнаҡтарҙы батырыу **6.** *кого-что*; *прост.* ебәреү; **запусти́ть карасе́й в пруд** быуаға табан балыҡтар ебәреү

**ЗАПУСТИ́ТЬ II** *сов. что* **1.** ташландыҡ хәлгә килтереү, рәтен ебәреү; **запусти́ть хозя́йство** хужалыҡты ташландыҡ хәлгә килтереү; **запусти́ть дела́** эштең рәтен ебәреү **2.** (*о болезни*) аҙҙырыу; **запусти́ть боле́знь** ауырыуҙы аҙҙырыу **3.** *с.-х.* һауыуҙы ташлатыу, һыуалдырыу

**ЗАПУ́ТАННОСТЬ** *ж* буталсыҡлыҡ; **запу́танность мы́слей** фекерҙәр буталсыҡлығы

**ЗАПУ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **запу́тать 2.** *прил.* сейәлгән, сеймәлгән; **запу́танные ни́тки** сейәлгән еп **3.** *прил.*; *перен.* буталсыҡ; **запу́танный вопро́с** буталсыҡ мәсьәлә

**ЗАПУ́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* сейәлдереү, сеймәлтеү, сыуалтыу; **запу́тать ни́тки** епте сейәлдереү **2.** *что* бутау, сыуалтыу; **запу́тать де́ло** эште бутау **3.** *кого-что*; *разг.* (*сбить с толку*) яңылыштырыу, бутау; **запу́тать разве́дчиков** разведчиктарҙы бутау **4.** *кого*; *перен., разг.* (*впутать*) бутау, (насар эшкә) ҡатнаштырыу; **запу́тать в опа́сное де́ло** хәүефле эшкә ҡатнаштырыу

**ЗАПУ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** сейәлеү, сеймәлеү, сыуалыу; **верёвка запу́талась** бау сейәлде **2.** (*усложниться*) ҡатмарлашыу, тәртип юғалыу, буталыу; **де́ло запу́талось** эш буталды **3.** *в чём* уралыу, эләгеү; **запу́таться в сетя́х** ауға эләгеү **4.** *в чём* и *без доп.*; *разг.* ығы-зығы килеү, юғалып ҡалыу, буталыу; **запу́таться в мелоча́х жи́зни** тормош мәшәҡәттәре менән юғалып ҡалыу **5.** *разг.* (*сбиться — о речи, мыслях и т.п.*) уй-фекерләүҙә буталыу, яңылышыу; **свиде́тель запу́тался** шаһит (яуабында) буталды **6.** *прост.* аҙашып йөрөү, юлдан яҙлығыу; **запу́таться в лесу́** урманда аҙашып йөрөү

**ЗАПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **запу́тать**

**ЗАПУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **запу́таться 2.** *страд. от* **запу́тывать**

**ЗАПУШИ́ТЬ** *сов. что* бәҫ ҡуныу (ҡаплау), бәҫләнеү; **и́ней запуши́л окно́** тәҙрәгә бәҫ ҡунған

**ЗАПУ́ЩЕННОСТЬ** *ж* **1.** ташландыҡ хәлдә булыу; **запу́щенность хозя́йства** хужалыҡтың ташландыҡ хәлдә булыуы **2.** (*о болезни*) аҙған булыу

**ЗАПУ́ЩЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **запусти́ть** II; **2.** *прил.* ҡаралмаған, ташландыҡ хәлгә килгән; **запу́щенный сад** ташландыҡ хәлгә килгән баҡса **3.** *прил.* (*о болезни*) аҙған; **запу́щенная ра́на** аҙған яра

**ЗАПЧА́СТИ** *мн.* (*ед.* **запча́сть** *ж*) (*запасные части*) запас частар

**ЗАПЫЛА́ТЬ** *сов.* **1.** дөрләп янып китеү, ялҡынланып яна башлау; **костёр запыла́л** усаҡ дөрләп янып китте **2.** (*покраснеть*) ҡыҙарыу, уттай яныу; **его́ щёки запыла́ли** биттәре уттай янып китте

**ЗАПЫЛИ́ТЬ** *сов. что* туҙанлау, туҙанландырыу, саңлау, саңландырыу, саң (туҙан) ҡундырыу; **запыли́ть сапоги́** итекте саңландырыу

**ЗАПЫЛИ́ТЬСЯ** *сов.* туҙанланыу, саңланыу, саң (туҙан) ҡуныу; **оде́жда запыли́лась** кейем туҙанланды

**ЗАПЫХА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* тын бөтөү (ҡыҫылыу); **запыха́ться от бе́га** йүгереүҙән тын ҡыҫылыу

**ЗАПЫХТЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** аһылдау, ауыр тын алыу **2.** ухылдау; **теплохо́д запыхте́л** теплоход ухылдай башланы

**ЗАПЯ́СТЬЕ** *с* **1.** ҡушҡар (беләҙек) һөйәктәре **2.** *уст.* (*браслет*) беләҙек

**ЗАПЯТА́Я** *ж* өтөр; **поста́вить запяту́ю** өтөр ҡуйыу

**ЗАПЯ́ТКИ** *только мн.* артбаҫма (*каретала лакейҙар, хеҙмәтселәр баҫып йөрөү өсөн баҫҡыс*)

**ЗАПЯТНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *прям., перен.* бысратыу, таплау, тап төшөрөү; **запятна́ть и́мя** исемгә тап төшөрөү **2.** *кого*; *разг.* (*в игре в пятнашки*) туп (ҡул) менән уйнаусыға тейеү

**ЗАРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **зарабо́тать** I

**ЗАРАБО́ТАТЬ I** *сов. что* и *без доп.* **1.** эшләп табыу; **зарабо́тать де́ньги че́стным трудо́м** аҡсаны намыҫлы хеҙмәт менән эшләп табыу **2.** *прост.* алыу, эләктереү; **зарабо́тать вы́говор** шелтә алыу

**ЗАРАБО́ТАТЬ II** *сов.* (*начать работать*) эшләй башлау; **маши́на зарабо́тала** машина эшләй башланы

**ЗАРАБО́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*устать от работы*) күп (оҙаҡ) эшләп арыу, эшләй-эшләй арып бөтөү **2.** эш менән мауығып китеү, (оҙаҡ) күп эшләп ташлау; **зарабо́тался до полу́ночи** төн уртаһына тиклем эшләп ташлағанмын

**ЗА́РАБОТНЫЙ: за́работная пла́та** эш хаҡы

**ЗА́РАБОТОК** *м* **1.** эш хаҡы; **годово́й за́работок** йыллыҡ эш хаҡы **2.** *обычно мн.* **за́работки**; *разг.* (ялланып) аҡса эшләү; **уходи́ть на за́работки** аҡса эшләргә китеү

**ЗАРА́ВНИВАТЬ** *несов. см.* **заровня́ть**

**ЗАРАЖА́ЕМОСТЬ** *ж* йоғошлолоҡ, йоғошланыу; **заража́емость пшени́цы** бойҙайҙың йоғошланыуы

**ЗАРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **зарази́ть**

**ЗАРАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зарази́ться** **2.** *страд. от* **заража́ть**

**ЗАРАЖЕ́НИЕ** *с см.* **зарази́ть** — **заража́ть**; **зараже́ние кро́ви** ауырыуҙың ҡанға китеүе; **зараже́ние во́здуха** һауаның ағыуланыуы; **радиоакти́вное зараже́ние ме́стности** ерҙең (тирәяҡтың) радиоактив ҡалдыҡтар менән ағыуланыуы

**ЗАРАЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **зарази́ть** **2.** *прил.* ағыулы; **заражённый во́здух** ағыулы һауа

**ЗАРА́З** *нареч.*; *разг.* бер юлы; **зара́з скоси́ли всё по́ле** бер юлы бөтә яланды сабып бөттөләр

**ЗАРА́ЗА** *ж* **1.** йоғошло ауырыу; **исто́чники зара́зы** йоғошло ауырыу сығанаҡтары **2.** *прост.*, *бран.* ҡәбәхәт, шаҡшы

**ЗАРАЗИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** йоғошлолоҡ, йоғошло булыу; **зарази́тельность боле́зни** ауырыуҙың йоғошлолоғо **2.** *перен.* тәьҫирлелек, ихласлыҡ; **зарази́тельность сме́ха** көлөүҙең ихласлығы

**ЗАРАЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* йоғошло, йоғоусан; **боле́знь зарази́тельна** был ауырыу йоғошло **2.** *перен.* тәьҫирле, тәьҫир итерлек, тәьҫире көслө, мауыҡтырғыс, йоғошло, ихлас; **зарази́тельный приме́р** тәьҫир итерлек миҫал; **дурно́й приме́р зарази́телен** насар ғәҙәт йоғошло, алама ғәҙәттең (ҡылыҡтың) тәьҫире көслө; **зарази́тельный смех** ихлас көлөү

**ЗАРАЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*, *чем* йоҡтороу; **зарази́ть гри́ппом** грипп йоҡтороу **2.** *что*, *чем* ағыулау, бысратыу; **зарази́ть во́ду фено́лом** һыуҙы фенол менән ағыулау **3.** *кого-что*, *чем*; *перен.* (*внушить свои чувства*) арбау, тәьҫир итеү, мауыҡтырыу, йоҡтороу; **зарази́ть всех свои́м весе́льем** бөтәһенә лә шат кәйеф йоҡтороу

**ЗАРАЗИ́ТЬСЯ** *сов. чем* **1.** йоҡтороу, йоғоу, эләктереү; **зарази́ться гри́ппом** грипп йоҡтороу **2.** *перен.* бирелеү, эйәреү, ҡушылып китеү; **зарази́ться о́бщей ра́достью** дөйөм шатлыҡҡа ҡушылып китеү

**ЗАРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йоғошло; **зара́зная боле́знь** йоғошло ауырыу **2.** *разг.* йоғошло (ауырыуҙар) …ы; **зара́зное отделе́ние** йоғошло ауырыуҙар бүлеге

**ЗАРА́НЕЕ** *нареч.* алдан, алдан уҡ; **зара́нее подгото́виться** алдан уҡ әҙерләнеп ҡуйыу

**ЗАРАПОРТОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күп һөйләп буталыу, артығын һөйләп ташлау

**ЗАРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **зарасти́**

**ЗАРАСТИ́** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* ҡапланыу, (үлән) баҫыу; **зарасти́ мхом** мүк менән ҡапланыу; **сад заро́с траво́й** баҡсаны үлән баҫҡан; **зарасти́ бородо́й** һаҡал баҫыу **2.** *разг.* төҙәлеү, уңалыу, бөтәшеү; **ра́на заросла́** яра уңалды

**ЗАРАСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *чем* ҡаплатыу, (үлән менән) баҫтырыу; **зарасти́ть траво́й** үлән менән ҡаплатыу **2.** *разг.* төҙәлтеү, уңалтыу, бөтәштереү (*яраға ҡарата*)

**ЗАРВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* арттырып ебәреү, шашып китеү

**ЗАРДЕ́ТЬ** *сов.* ҡыҙарыу, ҡыҙарып китеү; **небоскло́н зарде́л** күк ҡабағы ҡыҙарҙы

**ЗАРДЕ́ТЬСЯ** *сов. см.* **зарде́ть**; **де́вушка зарде́лась** ҡыҙыҡай ҡыҙарып китте

**ЗАРЕВЕ́ТЬ** *сов.* **1.** үкереп (аҡырып) ебәреү; **зверь зареве́л** йыртҡыс үкереп ебәрҙе **2.** *разг.* аҡырып (үкереп) илап ебәреү, илай башлау; **де́ти зареве́ли** балалар үкерешеп илап ебәрҙе

**ЗА́РЕВО** *с* шәүлә, шаңдаҡ, (офоҡтағы) ҡыҙыллыҡ; **за́рево пожа́ра** янғын шәүләһе; **за́рево зака́та** шәфәҡ ҡыҙыллығы

**ЗАРЕГИСТРИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* теркәү, теркәп ҡуйыу, регистрациялау

**ЗАРЕГИСТРИ́РОВАТЬСЯ** *сов.* **1.** теркәлеү, регистрацияланыу; **зарегистри́роваться у секретаря́** секретарҙа регистрацияланыу **2.** *с кем*; *разг.* никах теркәү, яҙылышыу; **зарегистри́роваться в за́гсе** загста никах(ты) теркәү

**ЗАРЕ́З** *м в знач. сказ.*; *разг.* бәлә, эш харап; **без де́нег пря́мо заре́з** аҡсаһыҙ бөтөнләй эш харап ♦ **до заре́зу** бик, үтә, сиктән тыш

**ЗАРЕ́ЗАТЬ** *сов. кого* һуйыу, салыу, боғаҙлау; **заре́зать быка́** үгеҙ һуйыу; **волк заре́зал овцу́** бүре һарыҡты боғаҙлаған ♦ **без ножа́ заре́зать** бысаҡһыҙ һуйыу, бик ауыр хәлгә ҡуйыу; **хоть заре́жь(те)** бер нисек тә, һис тә (*үлтерһәң дә булмай*)

**ЗАРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һуйылыу, үҙен-үҙе һуйыу

**ЗАРЕЗЕРВИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* резервҡа ҡалдырыу, һаҡлап тотоу

**ЗАРЕКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **заре́чься**

**ЗАРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое йылға аръяғындағы; **заре́чная у́лица** йылға аръяғындағы урам

**ЗАРЕ́ЧЬЕ** *с* йылға аръяғы

**ЗАРЕ́ЧЬСЯ** *сов.* -маҫҡа/-мәҫкә ант (тәүбә) итеү, һүҙ биреү; **заре́чься кури́ть** тәмәке тартмаҫҡа тәүбә итеү

**ЗАРЖА́ВЕТЬ** и **ЗАРЖАВЕ́ТЬ** *сов.* тутығыу, тут баҫыу; **желе́зная кры́ша заржа́вела** тимер ҡыйыҡ тутыҡҡан

**ЗАРЖА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое тутыҡҡан, тут баҫҡан; **заржа́вленный нож** тутыҡҡан бысаҡ

**ЗАРЖА́ТЬ** *сов.* кешнәп ебәреү; **ло́шадь заржа́ла** ат кешнәп ебәрҙе

**ЗАРИСОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* рәсемен эшләү (төшөрөү), һүрәткә төшөрөү; **зарисова́ть старика́** ҡарттың рәсемен эшләү **2.** *что*; *разг.* һүрәт менән тултырыу, рәсем яһап тултырыу; **зарисова́ть альбо́м** альбомды һүрәт менән тултырыу

**ЗАРИСО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **зарисова́ть 2.** рәсем, һүрәт; **сде́лать зарисо́вки** һүрәттәр яһау **3.** *лит.* һүрәтләмә

**ЗАРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **зарисова́ть**

**ЗА́РИТЬСЯ** *несов. на кого-что*; *прост.* ҡыҙығыу, күҙ ҡыҙыу; **за́риться на чужо́е добро́** кеше байлығына ҡыҙығыу

**ЗАРИФМОВА́ТЬ** *сов. что* рифмалаштырыу, рифмаға һалыу; **зарифмова́ть слова́** һүҙҙәрҙе рифмалаштырыу

**ЗАРИФМО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **зарифмова́ть**

**ЗАРНИ́ЦА** *ж* ялағай, һаҙағай, нәжәгәй; **вспы́хивают зарни́цы** ялағай ялтырай

**ЗАРОВНЯ́ТЬ** *сов. что* тигеҙләү, күмеп тигеҙләү; **заровня́ть я́му** соҡорҙо тигеҙләү

**ЗАРОВНЯ́ТЬСЯ** *сов.* тигеҙләнеү, күмелеп тигеҙләнеү

**ЗАРОДИ́ТЬ** *сов. что* тыуҙырыу, уятыу; **зароди́ть наде́жду** *в ком кемдәлер* өмөт уятыу

**ЗАРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* тыуыу, барлыҡҡа килеү; **у меня́ зароди́лась одна́ мысль** миндә бер фекер тыуҙы

**ЗАРО́ДЫШ** *м* **1.** (*у человека, животного*) яралғы, бала; (*у растений*) бәбәк **2.** *перен.* башланғыс осор, баш; **заро́дыш боле́зни** ауырыуҙың башы; **заро́дыш вели́ких дел** бөйөк эштәрҙең башы

**ЗАРО́ДЫШЕВЫЙ,** -ая, -ое яралғы ...ы, бәбәк ...ы; **заро́дышевые кле́тки** яралғы күҙәнәктәре

**ЗАРОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **зароди́ть**

**ЗАРОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зароди́ться 2.** *страд. от* **зарожда́ть**

**ЗАРОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **зароди́ть, зароди́ться**; **зарожде́ние жи́зни** тормоштоң барлыҡҡа килеүе

**ЗАРОЗОВЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*выделиться розовым цветом*) алланып (алһыуланып) күренеү **2.** (*начать розоветь*) алһыуланыу, алланыу, аллана башлау; **его́ щёки зарозове́ли** уның бит алмаһы алһыуланды

**ЗАРО́К** *м* ант, тәүбә, вәғәҙә; **дать заро́к** тәүбә итеү

**ЗАРОНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* төшөрөп ебәреү; **зарони́ть ключ за шкаф** асҡысты шкаф артына төшөрөп ебәреү **2.** *перен.* ҡуҙғатыу, тыуҙырыу, уятыу; **зарони́ть сомне́ние** шик тыуҙырыу (һалыу) ♦ **зарони́ть и́скру** *чего* сатҡы һалыу, ниҙер уятыу

**ЗАРОНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *уст.* күңелгә инеү, йөрәккә үтеү; **его́ слова́ зарони́лись в ду́шу** уның һүҙҙәре йөрәккә үтте

**ЗА́РОСЛЬ** *ж* ҡыуаҡлыҡ, әрәмәлек; **за́росли сире́ни** сирень ҡыуаҡлығы

**ЗАРПЛА́ТА** *ж*; *разг.* (*заработная плата*) эш хаҡы; **получи́ть зарпла́ту** эш хаҡы алыу

**ЗАРУБА́ТЬ** *несов. см.* **заруби́ть** 1, 2, 4

**ЗАРУБЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое сит ил ...ы, сит илдәге, сит илдәрҙәге; **зарубе́жная печа́ть** сит ил матбуғаты

**ЗАРУБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* сабып үлтереү **2.** *что* (*сделать зарубку*) киртеү, киртләсләү, киртеп ҡуйыу; **заруби́ть бревно́** бүрәнәне киртеп ҡуйыу **3.** *что* и *без доп.*; *разг.* хәтергә алыу (һалыу); **заруби́ть себе́ на бу́дущее** киләсәккә үҙеңә хәтергә алып ҡуйыу **4.** *горн.* (*сделать вруб*) тишеү, ярып ҡуйыу ♦ **заруби́ть на носу́ (на лбу)**; **заруби́ть в па́мяти** ҡолаҡҡа киртеп ҡуйыу, онотолмаҫлыҡ итеү

**ЗАРУ́БКА** *ж* тамға, киртек; **зару́бка на де́реве** ағасҡа һалынған тамға

**ЗАРУБЦЕВА́ТЬСЯ** *сов.* уңалыу, бөтәшеү, ит үреү (*яра, йөй һ.б. хаҡында*); **ра́на зарубцева́лась** яраға ит үргән

**ЗАРУБЦО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **зарубцева́ться**

**ЗАРУГА́ТЬ** *сов. кого*; *прост.* әрләп (тиргәп) ташлау, һүгеү

**ЗАРУМЯ́НИВАТЬ** *несов. см.* **зарумя́нить**

**ЗАРУМЯ́НИТЬ** *сов. что* **1.** ҡыҙартыу, алһыуландырыу, алһыу төҫкә индереү; **моро́з зарумя́нил щёки** һыуыҡ битте ҡыҙартты **2.** ҡыҙҙырыу, ҡыҙартҡансы бешереү, йөҙөн килтереү; **зарумя́нить пиро́г** бәлештең йөҙөн килтереү

**ЗАРУМЯ́НИТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыҙарыу, алһыуланыу, алһыу төҫкә инеү; **лицо́ зарумя́нилось** бит ҡыҙарҙы **2.** ҡыҙарғансы бешеү, йөҙө килеү; **бу́лка зарумя́нилась** ҡалас ҡыҙарҙы

**ЗАРУЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **заручи́ться**

**ЗАРУЧИ́ТЬСЯ** *сов. чем* (вәғәҙә, һүҙ, ризалыҡ) алыу, алып ҡуйыу; **заручи́ться подде́ржкой** ярҙамлашырға ризалығын алыу

**ЗАРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **зары́ть**

**ЗАРЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **зары́ться 2.** *страд. от* **зарыва́ть**

**ЗАРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **зарва́ться**

**ЗАРЫДА́ТЬ** *сов.* үкереп илай башлау, ҡысҡырып илап ебәреү

**ЗАРЫСИ́ТЬ** *сов.* юртып китеү, юрта башлау; **ло́шадь зарыси́ла** ат юртып китте

**ЗАРЫ́ТЬ** *сов. кого-что* күмеү, күмеп ҡуйыу; **зары́ть в зе́млю** ергә күмеү ♦ **зары́ть тала́нт (в зе́млю)** талантты (оҫталыҡты) баҫып ҡалдырыу

**ЗАРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** күмелеү, ҡапланыу, бөркәнеү; **зары́ться в се́но** бесәнгә күмелеү; **зары́ться в поду́шку** мендәргә ҡапланыу **2.** *перен.* сумыу, бирелеү; **зары́ться в кни́ги** китапҡа сумыу

**ЗАРЫЧА́ТЬ** *сов.* ырылдап ебәреү, ырылдай башлау

**ЗАРЯ́** *ж* **1.** (*утренняя*) таң; (*вечерняя*) шәфәҡ; **встать с зарёй** таңдан тороу; **на заре́** таңдан, таң менән **2.** *перен.* таң; **заря́ но́вой жи́зни** яңы тормош таңы; **заря́ свобо́ды** ирек таңы ♦ **от зари́ до зари́** көнө-төнө, бер таңдан икенсе таңға тиклем; **ни свет ни заря́** таң тишегенән, ҡара таңдан, таң һарыһынан

**ЗАРЯБИ́ТЬ I** *сов.* (*покрыть рябью*) бөҙөр менән ҡаплана башлау, бөҙөрләнеү; **ве́тер зарябил во́ду о́зера** ел күл өҫтөн бөҙөр менән ҡапланы

**ЗАРЯБИ́ТЬ II** *сов.* (*начать рябить*) асыҡ булып күренмәү, сыбарланып китеү; **у меня́ зарябило в глаза́х** күҙ алдым сыбарланып китте

**ЗАРЯ́Д** *м* **1.** яһаҡ (яһау), заряд; **ружейный заря́д** мылтыҡ яһағы; **карте́чный заря́д** картечлы яһаҡ **2.** *перен.* хис-тойғо байлығы, күңел (рух) күтәренкелеге; **заря́д бо́дрости** күңел күтәренкелеге ♦ **электри́ческий заря́д** электр заряды; **положи́тельный заря́д** ыңғай заряд

**ЗАРЯДИ́ТЬ I** *сов.* *что* **1.** яһау, ҡороу; **заряди́ть ружьё** мылтыҡ ҡороу; **заряди́ть фотоаппара́т** фотоаппаратты ҡороу **2.** заряд биреү, зарядлау; **заряди́ть аккумуля́тор** аккумуляторға заряд биреү

**ЗАРЯДИ́ТЬ II** *сов.* *что* и *без доп.*; *разг.* туҡтамау, туҡтай белмәү; **дождь заряди́л на це́лую неде́лю** ямғыр аҙна буйы туҡтаманы; **заряди́ть одно́ и то же** бер үк нәмәне тылҡыу, туҡтамай һөйләү

**ЗАРЯДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яһалыу, ҡоролоу; **ружьё заряди́лось** мылтыҡ ҡоролдо **2.** энергия алыу, зарядланыу; **батаре́я заряди́лась** батарея зарядланды **3.** *чем*; *перен.*, *разг.* көс алыу, хәл йыйыу

**ЗАРЯ́ДКА** *ж* **1.** *см.* **заряди́ть** I; **заря́дка винто́вки** винтовканы ҡороу **2.** зарядка; **у́тренняя заря́дка** иртәнге зарядка

**ЗАРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое заряд ...ы; **заря́дное устро́йство** заряд ҡоролмаһы

**ЗАРЯЖА́ТЬ** *несов.* *от* **заряди́ть** I

**ЗАРЯЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заряди́ться** **2.** *страд.* *от* **заряжа́ть**

**ЗАРЯ́ЖЕННЫЙ** и **ЗАРЯЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **зарядить** I; **2.** *прил.* яһалған, яһаулы, ҡоролған; **заря́женная винто́вка** яһаулы винтовка

**ЗАСА́ДА** *ж* боҫҡон, засада; **устро́ить заса́ду** боҫҡон ҡороу; **нарва́ться на заса́ду** боҫҡонға эләгеү; **вы́ставить заса́ду** боҫҡон ҡуйыу

**ЗАСАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ултыртыу, ултыртып сығыу; **засади́ть гря́дку цвета́ми** түтәлгә сәскәләр генә ултыртыу **2.** *кого*; *разг.* ултыртыу, ултыртып (бикләп) ҡуйыу; **засади́ть в тюрьму́** төрмәгә ултыртыу; **засади́ть учи́ться** уҡырға ултыртып ҡуйыу **3.** *что*; *разг.* (*всадить*) сабып (сәнсеп, ҡағып) индереү, батыра сабыу; **засади́ть топо́р в бревно́** бүрәнәгә балтаны батыра сабыу

**ЗАСА́ДНЫЙ,** -ая, -ое засада (боҫҡон) ...ы, засадалағы; **заса́дная гру́ппа** засада төркөмө

**ЗАСА́ЖИВАТЬ** *несов.* *см.* **засади́ть**

**ЗАСА́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **заса́лить** **2.** *прил.* майға (кергә) ҡатҡан, майланған, керләнгән, майлы, керле; **заса́ленный фа́ртук** майға ҡатҡан алъяпҡыс

**ЗАСА́ЛИВАТЬ I** *несов.* *см.* **заса́лить**

**ЗАСА́ЛИВАТЬ II** *несов.* *см.* **засоли́ть**

**ЗАСА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **заса́литься** **2.** *страд.* *от* **заса́ливать** I

**ЗАСА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **засоли́ться** **2.** *страд.* *от* **заса́ливать** II

**ЗАСА́ЛИТЬ** *сов.* *что* майландырып (керләндереп) бөтөрөү, майға (кергә) ҡатырыу; **заса́лить рукава́** еңде майға ҡатырыу

**ЗАСА́ЛИТЬСЯ** *сов.* майланыу, керләнеү, майға (кергә) ҡатыу, бысраныу; **сте́ны заса́лились** стеналар майланып бөткән

**ЗАСА́СЫВАТЬ** *несов.* *см.* **засоса́ть** I

**ЗАСА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* *страд.* *от* **заса́сывать**

**ЗАСА́ХАРЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **заса́харить** **2.** *прил.* шәкәрле, шәкәр һибелгән; **заса́харенные фру́кты** шәкәр һибелгән емештәр

**ЗАСА́ХАРИВАНИЕ** *с* *см.* **заса́харивать**, **заса́хариваться**; **заса́харивание мёда** балдың ҡомоғоуы

**ЗАСА́ХАРИВАТЬ** *несов.* *см.* **заса́харить**

**ЗАСА́ХАРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заса́хариться** **2.** *страд.* *от.* **заса́харивать**

**ЗАСА́ХАРИТЬ** *сов.* *что* шәкәрләү, шәкәр ҡушыу; **заса́харить фру́кты** емештәрҙе шәкәрләү

**ЗАСА́ХАРИТЬСЯ** *сов.* шәкәрләнеү, шәкәргә әйләнеү, ҡомоғоу (*балға ҡарата*); **варе́нье заса́харилось** ҡайнатма шәкәрләнгән; **мёд заса́харился** бал ҡомоҡҡан

**ЗАСВЕРКА́ТЬ** *сов.* ялтырай башлау, йымылдап китеү; **звёзды засверка́ли** йондоҙҙар йымылдап китте

**ЗАСВЕТИ́ТЬ I** *сов.* яҡтыртыу, яндырыу, тоҡандырыу, тоҡандырып ебәреү; **засвети́ть свечу́** шәм яндырыу

**ЗАСВЕТИ́ТЬ II** *сов.*; *фото.* яҡтыртып боҙоу, яҡты төшөрөү (*фотоплёнкаға ҡарата*)

**ЗАСВЕТИ́ТЬ III** *сов.*; *разг.* яҡтырта башлау, балҡыу, балҡып китеү; **засвети́ло со́лнце** ҡояш балҡыны

**ЗАСВЕТИ́ТЬСЯ I** *сов.*; *фото.* яҡтырыуҙан (яҡты төшөүҙән) боҙолоу

**ЗАСВЕТИ́ТЬСЯ II** *сов.* **1.** балҡыу, ялтырау, балҡып (ялтырап) китеү (күренеү); **засвети́лись огни́** уттар балҡып күренде **2.** *перен.* ялтырап китеү, ялтырап (балҡып, нурланып, асылып, яҡтырып) китеү; **его́ лицо́ засвети́лось** уның йөҙө яҡтырып китте

**ЗАСВЕТЛЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*выделиться светлым цветом*) ағарып (яҡтырып, балҡып) күренеү;

**вдали́ засветле́л па́рус** алыҫта елкән ағарып күренде **2.** (*начать светлеть*) яктыра башлау; **не́бо засветле́ло** күк яктыра башланы

**ЗА́СВЕТЛО** *нареч.* яктыла, якты саҡта, якты күҙҙә; **дое́хать за́светло** якты сакта барып етеү

**ЗАСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *сов. что* **1.** дөрөҫләү; **засвиде́тельствовать факт** фактты дөрөҫләү **2.** (*заверить*) раҫлау; **засвиде́тельствовать по́дпись** ҡултамғаны раҫлау

**ЗАСЕ́В** *м см.* **засе́ять** — **засева́ть**; **пе́рвый засе́в** тәүге сәсеү

**ЗАСЕВА́ТЬ** *несов. см.* **засе́ять**

**ЗАСЕДА́НИЕ** *с* ултырыш; **заседа́ние учёного сове́та** ғилми совет ултырышы; **проводи́ть заседа́ние** ултырыш үткәреү; **зал заседа́ний** ултырыштар залы

**ЗАСЕДА́ТЕЛЬ** *м* заседатель; **наро́дный заседа́тель** халыҡ заседателе; **избра́ть заседа́телем** заседатель итеп һайлау

**ЗАСЕДА́ТЬ I** *несов.* ултырыш үткәреү, ултырышта ҡатнашыу; **заседа́ть в сове́те** совет ултырышында ҡатнашыу; **до́лго заседа́ть** ултырышты оҙаҡҡа һуҙыу

**ЗАСЕДА́ТЬ II** *несов. см.* **засе́сть** 6, 7

**ЗАСЕДЛА́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* эйәрләү; **заседла́ть коня́** атты эйәрләү

**ЗАСЁДЛЫВАТЬ** *несов. см.* **заседла́ть**

**ЗА́СЕКА** и **ЗАСЕ́КА** *ж* **1.** киҫенте, ҡырҡынды (*урмандың ағасы ҡырҡылған урыны*) **2.** кәртә, тотҡарлыҡ (*сатай-ботай ятҡан ағастар өйөмө*)

**ЗАСЕКА́ТЬ I** *несов. см.* **засе́чь** I

**ЗАСЕКА́ТЬ II** *несов. см.* **засе́чь** II

**ЗАСЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **засе́чься** **2.** *страд. от* **засека́ть** I

**ЗАСЕКРЕ́ТИТЬ** *сов.* **1.** *что* йәшерен итеү, йәшеренгә әйләндереү; **засекре́тить докуме́нты** документтарҙы йәшерен итеү **2.** *кого*; *разг.* йәшерен эшкә ҡуйыу (алыу); **засекре́тить рабо́тника** хеҙмәткәрҙе йәшерен эшкә ҡуйыу

**ЗАСЕКРЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **засекре́тить**

**ЗАСЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **засели́ть** — **заселя́ть**; **заселе́ние тайги́** тайгаға күсеп ултырыу; **заселе́ние до́ма** йортҡа күсенеп сығыу

**ЗАСЕЛЁННОСТЬ** *ж* халыҡтың тығыҙлығы; **заселённость го́рода** ҡала (халҡының) тығыҙлығы

**ЗАСЕЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **засели́ть** **2.** *прил.* халҡы күп булған, кешеләр йәшәй башлаған, күсенеп сыҡҡан, күсенгән; **заселённый дом** кешеләр күсенгән (урынлашҡан) йорт, кеше йәшәгән өй

**ЗАСЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** урынлаштырыу, күсендереү, күсереү; **засели́ть но́вый дом** яңы йортҡа күсереү **2.** (*поселившись, занять*) күсеп ултырыу, инеп урынлашыу; **нике́м не заселённые ко́мнаты** бер кем дә инеп урынлашмаған бүлмәләр

**ЗАСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* урынлашыу, күсеп ултырыу, халыҡ күсеү; **но́вый микрорайо́н засели́лся** яңы биҫтәгә халыҡ күсте (күсеп ултырҙы)

**ЗАСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **засели́ть**

**ЗАСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **засели́ться** **2.** *страд. от* **заселя́ть**

**ЗАСЕМЕНИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ваҡ-ваҡ баҫып (йыбырлап) атлау

**ЗАСЕРЕБРИ́ТЬ** *сов. что* көмөш кеүек итеү, көмөшләү, көмөштәй ялтыратыу; **у́тренняя роса́ засеребри́ла траву́** иртәнге ысыҡ үләндәрҙе көмөштәй ялтыратты

**ЗАСЕРЕБРИ́ТЬСЯ** *сов.* көмөштәй ялтырап китеү, көмөшләнеү; **река́ засеребри́лась** йылға көмөштәй ялтырап китте

**ЗАСЕ́СТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*усесться*) ултырып алыу, уңайлап урынлашыу; **засе́сть в углу́** мөйөшкә ултырып алыу **2.** төпләнеү, ныҡыныу; **засе́сть в шта́бе** штабта төпләнеү **3.** *за что* и *с неопр.* (эшкә) ултырыу, ныҡлап тотоноу; **засе́сть за кни́ги** китапҡа ныҡлап тотоноу **4.** сыҡмау, оҙаҡҡа ҡалыу, ныҡлап ҡалыу; **засе́сть до́ма** өйҙә оҙаҡҡа ҡалыу; **засе́сть в дере́вне** ауылда оҙаҡҡа ҡалыу **5.** боҫоу, боҫоп (йәшеренеп) ултырыу; **засе́сть на чердаке́** өй башында йәшеренеп ултырыу **6.** (*застрять*) инеп ҡалыу, батыу, батып ҡалыу, тишеп (уйып) инеү; **пу́ля засе́ла в стене́** пуля стенаға тишеп ингән **7.** *перен.* инеп ҡалыу, һеңеү, биләү; **тоска́ засе́ла в душе́** күңелде һағыш биләне

**ЗАСЕ́ЧКА** *ж* **1.** (*зарубка*) тамға, билдә; **де́лать засе́чку** тамға һалыу **2.** (*рана на ноге лошади*) аяғын һуғыу, һуғылған аяҡ

**ЗАСЕ́ЧЬ I** *сов. что* **1.** киртеп билдә һалыу, киртеп ҡуйыу; **засе́чь де́рево** ағас киртеп билдә һалыу **2.** (*зафиксировать*) билдәләп ҡуйыу; **засе́чь огневы́е то́чки проти́вника** дошмандың ут нөктәләрен билдәләп ҡуйыу **3.** эләктереү, күҙҙән ысҡындырмау; **охра́нник засёк его́** һаҡсы уны эләктерҙе **4.** аяҡты һуғып яралау, һуҡтырыу (*атҡа ҡарата*); **вороно́й засёк но́гу** туры ат аяғын һуҡтырҙы ♦ **засе́чь вре́мя** ниҙеңдер башланған мәлен билдәләп ҡуйыу

**ЗАСЕ́ЧЬ II** *сов. кого* (*избить плетьми и т.п. до смерти*) һуҡтырып үлтереү, һуҡтырыу, һыҙырыу

**ЗАСЕ́ЧЬСЯ** *сов.* (*о лошади*) аяғын һуҡтырыу, һуҡтырып яралау; **ло́шадь засекла́сь** ат аяғын һуҡтырған

**ЗАСЕ́ЯТЬ** *сов. что* **1.** сәсеү, сәсеп бөтөрөү; **засе́ять поля́ пшени́цей** баҫыуҙарға бойҙай сәсеү **2.** *разг.* туҙҙырып (тултырып) ташлау; **засе́ять двор шелухо́й** ишек алдын сүп-сар менән тултырып ташлау

**ЗАСИДЕ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* тейеп (ҡунып) бысратыу, бысратып бөтөрөү; **му́хи засиде́ли карти́ну** себендәр һүрәтте бысратып бөтөргән

**ЗАСИДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** оҙаҡ ултырыу, күп (оҙаҡ) ултырып ташлау (китеү); **засиде́ться в гостя́х** ҡунаҡта оҙаҡ ултырыу **2.** *перен.* оҙаҡ тороу, күп ваҡыт үткәреү; **засиде́ться в тылу́** тылда оҙаҡ тороу ♦ **засиде́ться в де́вках (в деви́цах, в неве́стах)** *прост.* кейәүгә сыҡмай ултырыу, ҡыҙ көйө ҡартайыу

**ЗАСИ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **засиде́ть**

**ЗАСИ́ЖИВАТЬСЯ I** *несов. см.* **засиде́ться**

**ЗАСИ́ЖИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **заси́живать**

**ЗАСИЛОСОВА́ТЬ** *сов. что*; *с.-х.* силослау, силосҡа һалыу; **засилосова́ть кукуру́зу** кукурузды силослау

**ЗАСИ́ЛЬЕ** *с* баҫымсаҡлау, баҫыу, баҫым яһау

**ЗАСИНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*выделиться синим цветом*) күгәреп күренеү; **засине́ло мо́ре** диңгеҙ күгәреп күренде **2.** (*начать синеть*) күгәрә (зәңгәрләнә) башлау, күгәреү, зәңгәрләнеү; **во́здух засине́л** һауа зәңгәрләнә башланы

**ЗАСИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **засини́ть**

**ЗАСИ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **засини́ться** **2.** *страд. от* **заси́нивать**

**ЗАСИНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** күгәртеү, күк төҫкә буяу, күк итеү; **засини́ть о́зеро на карти́не** һүрәттәге күлде күк төҫкә буяу **2.** *разг.* синкеләү; **засини́ть бельё** керҙе күберәк синкеләп ташлау

**ЗАСИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** күккә буялыу, күк төҫкә инеү **2.** *разг.* артыҡ синкеләнеү

**ЗАСИЯ́ТЬ** *сов.* **1.** яҡтырып (асылып) китеү; **его́ лицо́ засия́ло** уның йөҙө яҡтырып китте **2.** (*показаться — о чём-л. сияющем*) балҡып китеү, ялтырап (йымылдап) күренә башлау; **на не́бе засия́ла звезда́** күктә йондоҙ йымылдап күренде

**ЗАСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **заскочи́ть**

**ЗАСКИРДОВА́ТЬ** *сов. что* эҫкертләү, эҫкерткә һалыу; **заскирдова́ть се́но** бесәнде эҫкертләү

**ЗАСКО́К** *м* **1.** *разг.*, *спец.* туҡтау, туҡталыу, туҡтап тороу (*механизм, ҡоролма һ.б. ҡарата*) **2.** *перен.*, *разг.* сәйерлек, сәйер ҡыланыш, буталыш, аймылышлыҡ

**ЗАСКОЛЬЗИ́ТЬ** *сов.* шыуа (тая) башлау, шыуып (тайып) китеү

**ЗАСКОРУ́ЗЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡытыршы, ҡаты, ярғыланған; **заскору́злые ру́ки** ҡытыршы ҡулдар **2.** *перен.* (*закоснелый*) ҡатып ҡалған, иҫкергән; **заскору́злые поря́дки** иҫкергән тәртиптәр

**ЗАСКОРУ́ЗНУТЬ** *сов.* **1.** ҡатыу, ҡытыршыланыу, ярылып бөтөү; **ру́ки заскору́зли** ҡулдар ҡытыршыланды **2.** *перен.* ҡатып ҡалыу, иҫкереү

**ЗАСКОЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *разг.* һикереп менеү, һикереп барып инеү; **заскочи́ть на теле́гу** арбаға һикереп менеп ултырыу **2.** *разг.*, *спец.* ҡыҫылыу, араға барып инеү (*механизмдарға ҡарата*) **3.** *прост.* инеп сығыу, юл ыңғай инеү; **заскочи́ть в магази́н** магазинға инеп сығыу

**ЗАСКРЕЖЕТА́ТЬ** *сов.* шығырлата (шығырлай) башлау; **заскрежета́ть зуба́ми** тештәрҙе шығырлата башлау

**ЗАСКРИПЕ́ТЬ** *сов.* шығырлау, шығырлап китеү, шығыр итеү

**ЗАСКУЧА́ТЬ** *сов.* һағына башлау; **заскуча́ть по до́му** өйҙө һағына башлау

**ЗАСЛА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** ебәреү, оҙатыу; **засла́ть груз** йөк(тө) оҙатыу; **засла́ть на ка́торгу** каторгаға ебәреү **2.** (йәшерен) ебәреү (*берәй маҡсат менән*); **засла́ть аге́нтов** агенттар ебәреү

**ЗАСЛЕДИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* тапап бысратыу, бысраҡ эҙ ҡалдырыу; **заследи́ть пол** иҙәнде тапап бысратыу

**ЗАСЛЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **заследи́ть**

**ЗАСЛЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* күҙҙе ҡаплау, күҙгә һылашыу; **снег заслепи́л глаза́** ҡар күҙгә һылашты

**ЗАСЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **заслепи́ть**

**ЗАСЛО́Н** *м* **1.** кәртә, ышыҡ; **устро́ить сне́жный засло́н** ҡарҙан кәртә (ышыҡ) яһау **2.** ҡаплам (*берәй операцияны үткәреүҙе тәьмин итеүсе хәрби отряд*); **вы́ставить засло́н** ҡаплам ҡуйыу **3.** *см.* **засло́нка**

**ЗАСЛОНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡаплау, ышыҡлау; **заслони́ть свет** яҡтылыҡты ҡаплау; **заслони́ть лицо́ от ве́тра** битте елдән ышыҡлау **2.** *перен.* оноттороу, баҫып тороу; **ра́дость заслони́ла го́ре** ҡыуаныс ҡайғыны баҫты

**ЗАСЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡапланыу, ышыҡланыу; **заслони́ться от со́лнца** ҡояштан ышыҡланыу

**ЗАСЛО́НКА** *ж* **1.** мейес ябыуы, мейес ҡапҡасы **2.** ҡапҡас; **засло́нка бу́нкера** бункер ҡапҡасы

**ЗАСЛОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **заслони́ть**

**ЗАСЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заслони́ться** **2.** *страд. от* **заслоня́ть**

**ЗАСЛУ́ГА** *ж* (күрһәткән) хеҙмәт, баһалы хеҙмәт, данлы эш; **заслу́ги пе́ред Ро́диной** Тыуған ил алдында күрһәткән хеҙмәт ♦ **по заслу́гам** хеҙмәтенә ҡарап, хеҙмәтенә күрә (бәрәбәр)

**ЗАСЛУ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заслужи́ть** **2.** *прил.* (*справедливый*) урынлы, хаҡлы; **заслу́женная похвала́** урынлы маҡтау; **заслу́женные упрёки** урынлы шелтә; **на заслу́женном о́тдыхе** хаҡлы ялда **3.** *прил.* (*в почётных званиях*) атҡаҙанған; **заслу́женный де́ятель нау́ки** атҡаҙанған фән эшмәкәре; **заслу́женный учи́тель** атҡаҙанған уҡытыусы **4.** *прил.* (*имеющий большие заслуги*) атаҡлы, танылған, күп хеҙмәт күрһәткән; **заслу́женный учёный** атаҡлы ғалим

**ЗАСЛУ́ЖИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **заслужи́ть** 1; **2.** хаҡлы (лайыҡлы) булыу; **заслу́живать осо́бого внима́ния** айырым иғтибарға лайыҡ булыу

**ЗАСЛУЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙаныу, ирешеү, лайыҡ булыу; **заслужи́ть дове́рие** ышаныс ҡаҙаныу; **заслужи́ть награ́ду** бүләккә лайыҡ булыу **2.** *разг.* (*выслужить*) алыу; **заслужи́ть зва́ние** исем алыу

**ЗАСЛУ́ШАТЬ** *сов. кого-что* тыңлау; **заслу́шать отчёт** отчет тыңлау; **заслу́шать докла́дчика** докладсыны тыңлау

**ЗАСЛУ́ШАТЬСЯ** *сов.* йотлоғоп (мауығып, бирелеп, онотолоп) китеп тыңлау; **заслу́шаться наро́дных пе́сен** халыҡ йырҙарын онотолоп китеп тыңлау

**ЗАСЛУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **заслу́шать**

**ЗАСЛУ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заслу́шаться 2.** *страд. от* **заслу́шивать**

**ЗАСЛЫ́ШАТЬ** *сов. что* **1.** ишетеү, ишетеп ҡалыу (алыу); **заслы́шать го́лос** *чей-л. кемдеңдер* тауышын ишетеп ҡалыу **2.** (*учуять*) һиҙеү, һиҙеп алыу; **заслы́шать за́пах** еҫте һиҙеп алыу

**ЗАСЛЫ́ШАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ишетелеү, ишетелеп ҡалыу

**ЗАСЛЮ́НИВАТЬ** *несов. см.* **заслюни́ть**

**ЗАСЛЮНИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* һеләгәйгә (шеләгәйгә) буяу, һеләгәйләп бөтөрөү

**ЗАСЛЮНЯ́ВИТЬ** *сов. что*; *прост. см.* **заслюни́ть**

**ЗАСМА́ТРИВАТЬ** *несов.*; *разг.* күҙ һалыу, ҡарап-ҡарап алыу; **засма́тривать в окно́** тәҙрәгә күҙ һалыу ♦ **засма́тривать в глаза́ (в лицо́)** *кому* күҙенә ҡарап тороу

**ЗАСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов. см.* **засмотре́ться**

**ЗАСМЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **засмея́ть**

**ЗАСМЕЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* көлкөгә ҡалдырыу

**ЗАСМЕЯ́ТЬСЯ** *сов.* көлөү, көлөп ебәреү, көлә башлау

**ЗАСМОЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ыҫмалалау, сайырлау; **засмоли́ть ло́дку** кәмәне ыҫмалалау **2.** *разг.* ыҫмалаға (сайырға) буяу, ыҫмала (сайыр) менән бысратыу

**ЗАСМОТРЕ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что* һоҡланып ҡарап тороу, күҙҙе алмай ҡарау

**ЗАСНЕ́ЖЕННЫЙ** и **ЗАСНЕЖЁННЫЙ,** -ая, -ое ҡар ҡаплаған, ҡар (көрт) баҫҡан; **засне́женное по́ле** ҡар ҡаплаған баҫыу

**ЗАСНУ́ТЬ** *сов.* йоҡоға талыу, йоҡлап китеү; **засну́ть то́лько под у́тро** таңға ҡарай (табан) ғына йоҡлап китеү ♦ **засну́ть ве́чным сном** мәңгелек йоҡоға талыу (китеү) (*үлеү*)

**ЗАСНЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* төшөрөү, төшөрөп алыу; **засня́ть спекта́кль** спектаклде төшөрөп алыу

**ЗАСО́В** *м* бик, келә; **отодвига́ть засо́в на воро́тах** ҡапҡалағы келәне шылдырыу

**ЗАСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **засу́нуть**

**ЗАСО́Л** *м* **1.** *см.* **засоли́ть 2.** тоҙлоҡ, тоҙлама; **пригото́вить засо́л для огурцо́в** ҡыярға тоҙлама әҙерләү

**ЗАСОЛЕ́НИЕ** *с* татырланыу, тоҙланыу; **засоле́ние по́чвы** тупраҡ(тың) татырланыуы

**ЗАСОЛЁННОСТЬ** *ж* артыҡ тоҙло булыу

**ЗАСОЛЁННЫЙ,** -ая, -ое артыҡ тоҙланған

**ЗАСОЛИ́ТЬ** *сов. что* тоҙлау, тоҙлап ҡуйыу; **засоли́ть огурцы́** ҡыяр тоҙлап ҡуйыу

**ЗАСОЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тоҙланыу, тоҙланып етеү; **огурцы́ хорошо́ засоли́лись** ҡыяр яҡшы тоҙланған **2.** тоҙға туйыныу, татырланыу

**ЗАСО́ЛКА** *ж*; *разг. см.* **засо́л** 1

**ЗАСО́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое тоҙлау ...ы; **засо́лочный цех** тоҙлау цехы

**ЗАСО́ЛЬЩИК** *м* тоҙлауСы (*эшсе*)

**ЗАСОМНЕВА́ТЬСЯ** *сов.* икеләнеү, шикләнеү, шиккә төшөү (ҡалыу), шикләнә башлау

**ЗАСОРЕ́НИЕ** *с см.* **засори́ть** — **засоря́ть**, **засори́ться** — **засоря́ться**; **засоре́ние посе́вов** сәсеүлектәрҙең сүпләнеүе ♦ **засоре́ние желу́дка** *мед.* ашҡаҙан боҙолоу(ы)

**ЗАСОРЁННОСТЬ** *ж* сүплелек, ҡыйлылыҡ; **засорённость зерна́** игендең ҡыйлылығы

**ЗАСОРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **засори́ть 2.** *прил.* сүпле, сүп баҫҡан, ҡый алған; **засорённые посе́вы** сүп баҫҡан сәсеүлектәр

**ЗАСОРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡыйлау, сүпләү, ҡыйландырыу, сүпләндереү; **засори́ть пол** иҙәнде ҡыйлау **2.** (*повредить чем-л. попавшим внутрь*) сүп (ҡый) төшөрөү, сүп-сар тығылдырыу; **засори́ть глаза́** күҙгә сүп төшөрөү; **засори́ть трубу́** торбаға сүп-сар тығылдырыу **3.** сүп (ҡый) баҫтырыу; **засори́ть по́ле** яланды сүптән баҫтырыу

**ЗАСОРИ́ТЬСЯ** *сов.* сүпләнеү, ҡыйланыу, бысраныу, тығылыу, сүп-сар тулыу; (*о глазах*) сүп төшөү; **ра́ковина засори́лась** раковина тығылған

**ЗАСОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **засори́ть**

**ЗАСОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **засори́ться 2.** *страд. от* **засоря́ть**

**ЗАСО́С** *м* һурыу; **засо́с во́здуха** һауа һурыу

**ЗАСОСА́ТЬ I** *сов.* **1.** *кого-что* йотоу, убыу, һурыу, һурып алыу; **боло́то засоса́ло оле́ня** боланды һаҙлыҡ упҡан **2.** *кого*; *перен.* инеп сумыу, батыу, йотоу; **его́ засоса́ла среда́** уны мөхит юҡҡа сығарҙы

**ЗАСОСА́ТЬ II** *сов.*; *разг.* имә (һура) башлау; **ребёнок засоса́л** бала имә башланы

**ЗАСО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** кибеү, ҡатыу, кибеп бөтөү; **бу́лка засо́хла** ҡалас ҡатҡан; **кра́ска засо́хла** буяу кибеп (ҡатып) бөткән **2.** (*завянуть*) кибеү, һулыу, ҡороу; **цветы́ засо́хли** сәскәләр ҡороған

**ЗА́СПАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **заспа́ть 2.** *прил.* йоҡоһо туймаған, йоҡоло; **за́спанные глаза́** йоҡоло күҙҙәр

**ЗАСПА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* йоҡо менән сығарыу, онотолоу; **заспа́ть все впечатле́ния** бар кисерештәрҙе йоҡо менән сығарыу

**ЗАСПА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ йоҡлау (йоҡлап китеү)

**ЗАСПЕШИ́ТЬ** *сов.*, *разг.* ашыға башлау, ҡабаланып китеү

**ЗАСПИРТОВА́ТЬ** *сов. кого-что* спиртлау, спиртҡа һалыу; **заспиртова́ть насеко́мое** бөжәкте спиртҡа һалыу

**ЗАСПО́РИТЬ** *сов.* бәхәсләшә башлау, бәхәсләшеп китеү, һүҙ көрәштерергә тотоноу

**ЗАСПО́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бәхәс менән мауығыу, бәхәскә бирелеп китеү

**ЗАСПОРИ́ТЬСЯ** *сов.* уңыу, уңайға китеү (*эшкә ҡарата*)

**ЗАСТА́ВА** *ж* **1.** *ист.* (*пост и место въезда в город*) ҡала ҡапҡаһы **2.** һаҡ; **пограни́чная заста́ва** сик һағы; **ко́нная заста́ва** атлы һаҡ

**ЗАСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **заста́ть**

**ЗАСТА́ВИТЬ I** *сов. что, чем* **1.** (*загромоздить*) тултырыу, тултырып бөтөү; **заста́вить ко́мнату ме́белью** бүлмәне йыһаз менән тултырыу **2.** (*загородить*) ҡаплап ҡуйыу; **заста́вить дверь шка́фом** ишекте шкаф менән ҡаплап ҡуйыу

**ЗАСТА́ВИТЬ II** *сов. кого-что* и *с неопр.* мәжбүр итеү, (ирекһеҙләп) ҡушыу; **заста́вить ждать** көтөргә мәжбүр итеү; **заста́вить отвеча́ть** яуап бирергә мәжбүр итеү ♦ **не заста́вить себя́ до́лго проси́ть** ялындырмау, тиҙ генә килешеү, риза булыу; **не заста́вить себя́ ждать** тиҙ генә килеү, көттөрмәү

**ЗАСТА́ВКА I** *ж* башлам, башбиҙәк (*китап битенең башындағы биҙәк*)

**ЗАСТА́ВКА II** *ж* ҡаплама (*тирмән тәгәрмәсенә килгән һыуҙы тота торған*)

**ЗАСТАВЛЯ́ТЬ I** *несов. см.* **заста́вить** I

**ЗАСТАВЛЯ́ТЬ II** *несов. см.* **заста́вить** II

**ЗАСТА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **застоя́ться**

**ЗАСТАРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **застаре́ть**

**ЗАСТАРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое иҫке, күптәнге, электән килгән, иҫкергән, ҡартайған, ҡарт; **застаре́лые грибы́** иҫкергән бәшмәктәр; **застаре́лая боле́знь** күптәнге ауырыу

**ЗАСТАРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡартайыу, олоғайыу; **лес застаре́л** урман ҡартайҙы **2.** *разг.* оҙаҡҡа һуҙылып көсәйеү, нығыныу; **боле́знь застаре́ла** ауырыу ныҡынған

**ЗАСТА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тура килтереү, осратыу, тап итеү; **я заста́л его́ до́ма** мин уны өйөндә тап иттем **2.** өҫтөнә барып сығыу, күреп ҡалыу, -ғанда/-гәндә булыу; **заста́ть врасплох** көтмәгәндә барып (килеп) сығыу; **заста́ть в живы́х** тере сағында күреп ҡалыу

**ЗАСТЁГИВАТЬ** *несов. см.* **застегну́ть**

**ЗАСТЁГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **застегну́ться 2.** *страд. от* **застёгивать**

**ЗАСТЕГНУ́ТЬ** *сов. что* элеү, эләктереү, ҡаптырыу; **застегну́ть пиджа́к** пинжәкте ҡаптырып ҡуйыу

**ЗАСТЕГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (төймәне) элеү, эләктереү, ҡаптырыу; **застегну́ться на все пу́говицы** бөтә төймәләрҙе лә эләктереү **2.** эленеү, ҡаптырылыу, эләктерелеү; **пиджа́к не застёгивается** пинжәк ҡаптырылмай

**ЗАСТЁЖКА** *ж* ҡаптырма, элмәк; **застёжка пальто́** пальто ҡаптырмаһы

**ЗАСТЕКЛИ́ТЬ** *сов. что* быялалау, быяла ҡуйыу (ҡуйҙырыу); **застекли́ть о́кна** тәҙрәгә быяла ҡуйыу

**ЗАСТЕКЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **застекли́ть**

**ЗАСТЕЛИ́ТЬ** *сов. что*; *разг. см.* **застила́ть**

**ЗАСТЕНОГРАФИ́РОВАТЬ** *сов. что* стенографиялау; **застенографи́ровать речь** телмәрҙе стенографиялау

**ЗАСТЕ́НОК** *м* төрмә, зиндан; **бро́сить в засте́нок** төрмәгә ябыу

**ЗАСТЕ́НЧИВОСТЬ** *ж* оялсанлыҡ, тартыныусанлыҡ, ҡыйыуһыҙлыҡ; **страда́ть засте́нчивостью** оялсанлыҡ менән ыҙаланыу

**ЗАСТЕ́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое оялсан, ҡыйыуһыҙ; **засте́нчивая де́вушка** оялсан ҡыҙ

**ЗАСТЕСНЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оялыу, тартыныу, оялып (уңайһыҙланып) китеү; **ребёнок застесня́лся** бала оялып китте

**ЗАСТИГА́ТЬ** *несов. см.* **засти́чь**, **засти́гнуть**

**ЗАСТИ́ГНУТЬ** *сов. см.* **засти́чь**

**ЗАСТИЛА́ТЬ** *несов. см.* **застла́ть**

**ЗАСТИЛА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **застла́ться 2.** *страд. от* **застила́ть**

**ЗАСТИ́ЛКА** *ж см.* **застила́ть** 1; **засти́лка по́ла** иҙән йәйеү

**ЗАСТИРА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** йыуыу, йыуып алыу (таҙартыу); **застира́ть пятно́ на ска́терти** ашъяулыҡтағы тапты йыуып таҙартыу **2.** (*испортить стиркой*) йыуа-йыуа (эштән сығарыу) боҙартыу; **застира́ть бельё** эс кейемен йыуа-йыуа эштән сығарыу

**ЗАСТИ́РЫВАТЬ** *несов. см.* **застира́ть**

**ЗАСТИ́ЧЬ** и **ЗАСТИ́ГНУТЬ** *сов. кого-что* өҫтөнә баҫыу (сығыу), көтмәгәндә барып сығыу, эләктереү; **засти́чь на ме́сте преступле́ния** енәйәт эшләгән ергә көтмәгәндә барып сығыу; **гроза́ засти́гла дете́й** балалар йәшенле ямғырға эләкте

**ЗАСТЛА́ТЬ** *сов. что* **1.** йәйеү, түшәү, йәйеп ҡуйыу; **застла́ть пол ковро́м** иҙәнгә келәм йәйеү **2.** ҡаплау, ҡаплап алыу, томалау; **ту́чи застла́ли не́бо** күкте болоттар ҡапланы

**ЗАСТЛА́ТЬСЯ** *сов.* ҡапланыу, томаланыу; **доли́на застла́лась тума́ном** үҙән томан менән ҡапланды

**ЗАСТО́Й** *м* **1.** тоҡтарлыҡ, туктау, хәрәкәтһеҙлек; **засто́й кро́ви** ҡан йөрөшө туктауы **2.** *перен.* торғонлоҡ; **засто́й в эконо́мике** иҡтисадтағы торғонлоҡ; **пери́од засто́я** торғонлоҡ осоро

**ЗАСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тоҡтарланған, туктап ҡалған, туҡталған, ағымһыҙ; **засто́йное**

**о́зеро** (ағыуҙан) туҡталған күл **2.** торғон (торғонлоҡ) ...ы; **засто́йное вре́мя** торғонлоҡ ваҡыты **3.** оҙаҡҡа һуҙылған, оҙайлы; **засто́йное пья́нство** оҙайлы эскелек

**ЗАСТОЛБИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* бағана(лар) ултыртыу, бағана(лар) менән сик билдәләү; **застолби́ть уча́сток** бағаналар менән ер бүлеменең сиген билдәләү

**ЗАСТО́ЛЬЕ** *с*; *разг.* табын, табын өҫтәле, һый; **пра́здничное засто́лье** байрам табыны

**ЗАСТО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** табын ...ы, табындағы; **засто́льная бесе́да** табындағы әңгәмә **2.** *в знач. сущ.* **засто́льная** *ж* табын йыры

**ЗАСТОНА́ТЬ** *сов.* ыңғыраша башлау, ыңғырашып ҡуйыу

**ЗАСТО́ПОРИВАТЬ** *несов. см.* **засто́порить**

**ЗАСТО́ПОРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **засто́пориться 2.** *страд. от* **засто́поривать**

**ЗАСТО́ПОРИТЬ** *сов. что* **1.** туҡтатыу, хәрәкәтһеҙ ҡалдырыу **2.** *перен.*, *разг.* (*задержать*) туҡтатып (тотоп) тороу; **засто́порить де́ло** эште туҡтатып тороу

**ЗАСТО́ПОРИТЬСЯ** *сов.* **1.** туҡтау, туҡтап ҡалыу, хәрәкәтһеҙ ҡалыу; **маши́на засто́порилась** машина туҡтап ҡалды **2.** *перен.*, *разг.* туҡталыу, тотҡарланыу; **рабо́та засто́порилась** эш тотҡарланды

**ЗАСТОЯ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *прост.* оҙаҡ тик торған, оҙаҡ хәрәкәтһеҙ торған; **застоя́лый конь** оҙаҡ тик торған ат

**ЗАСТОЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** оҙаҡ тик (хәрәкәтһеҙ) тороу; **конь застоя́лся** ат оҙаҡ тик торған **2.** оҙаҡ тороу, тотҡарланыу; **застоя́ться у витри́ны** витрина янында оҙаҡ тороу **3.** (*испортиться*) оҙаҡ тороу, боҙолоу, иҫкереү; **вода́ в бо́чке застоя́лась** мискәләге һыу оҙаҡ торған (иҫкергән, боҙолған)

**ЗАСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **застро́ить**

**ЗАСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **застро́иться 2.** *страд. от* **застра́ивать**

**ЗАСТРАХОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** страховкалау; **застрахова́ть маши́ну** машинаны страховкалау **2.** *перен.* (*обезопасить*) һаҡланыу сараһын күреү

**ЗАСТРАХОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** страховкалау, страховкаланыу; **застрахова́ться на большу́ю су́мму** ҙур суммаға страховкаланыу **2.** *перен.* (*обезопасить себя*) үҙеңде һаҡлау сараһын күреү, һаҡланыу

**ЗАСТРАХО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **застрахова́ть**

**ЗАСТРАХО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **застрахова́ться 2.** *страд. от* **застрахо́вывать**

**ЗАСТРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **застря́ть**

**ЗАСТРЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **застрели́ть**

**ЗАСТРЕЛИ́ТЬ** *сов. кого* атып үлтереү; **застрели́ть медве́дя** айыуҙы атып үлтереү

**ЗАСТРЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* атылыу, атылып үлеү

**ЗАСТРЕ́ЛЬЩИК** *м* и **ЗАСТРЕ́ЛЬЩИЦА** *ж* башлап ебәреүсе, әйҙәүсе; **застре́льщик соревнова́ния** ярышты башлап ебәреүсе

**ЗАСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **застри́чь**

**ЗАСТРИ́ЧЬ** *сов. что*; *разг.* төптән ҡырҡыу, тәрән ҡырҡыу (*тырнаҡты*)

**ЗАСТРОГА́ТЬ** *сов. что* йышыу, йышып шымартыу, юнып ослау (*таҡтаны йәки таяҡты*)

**ЗАСТРО́ИТЬ** *сов. что* (*занять постройками*) төҙөү, һалыу

**ЗАСТРО́ИТЬСЯ** *сов.* төҙөлөү, һалыныу, төҙөлөп (һалынып) бөтөү; **го́род застро́ился** ҡала төҙөлөп бөткән

**ЗАСТРО́ЙКА** *ж см.* **застро́ить**; **застро́йка окра́ин го́рода** ҡала ситтәрендәге төҙөлөш

**ЗАСТРО́ЙЩИК** *м* төҙөүсе, һалыусы; **коллекти́в застро́йщиков** төҙөүселәр коллективы

**ЗАСТРОЧИ́ТЬ I** *сов. что* (*зашить*) тегеү, тегеп сығыу; **застрочи́ть швы** йөйҙәрҙе тегеп сығыу

**ЗАСТРОЧИ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* **1.** тиҙ-тиҙ яҙа (һыҙғылай) башлау **2.** туҡтауһыҙ ата башлау (*пулемёттан, автоматтан һ.б.*)

**ЗАСТРЯ́ТЬ** *сов.* **1.** инеп ултырыу, ҡаҙалыу; **пу́ля застря́ла в лёгких** пуля үпкәгә инеп ултырған **2.** батыу, батып ҡалыу; **колесо́ застря́ло в грязи́** тәгәрмәс батҡаҡҡа батты **3.** *перен.*, *разг.* тотҡарланыу, тотолоп ятыу; **де́ло застря́ло в канцеля́рии** эш кәнсәләрҙә тотҡарланып ята ♦ **застря́ть в го́рле** әйтә алмау, әйтмәй ҡалдырыу, тамаҡҡа килеп тығылыу

**ЗАСТУДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** һыуытыу, туңдырыу; **застуди́ть и́збу** өйҙө һыуытыу **2.** өшөтөү, һалҡын (һыуыҡ) тейҙереү; **застуди́ть го́рло** тамаҡҡа һалҡын тейҙереү; **застуди́ть ребёнка** балаға һалҡын тейҙереү

**ЗАСТУДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һалҡын тейҙереү, өшөү, һыуыҡ алыу

**ЗАСТУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **застуди́ть**

**ЗАСТУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **застуди́ться 2.** *страд. от* **засту́живать**

**ЗАСТУ́КАТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* **1.** тотоу, эләктереү; **засту́кать во́ра** бурҙы эләктереү **2.** аңдып үлтереү

**ЗА́СТУП** *м* тимер көрәк

**ЗАСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **заступи́ться**

**ЗАСТУПИ́ТЬСЯ** *сов. за кого* яҡлау, яҡлап сығыу, яҡлашыу; **заступи́ться за дру́га** дуҫты яҡлау

**ЗАСТУ́ПНИК** *м* и **ЗАСТУ́ПНИЦА** *ж* яҡлаусы, яҡлашыусы, ҡурғаусы, ҡурсалаусы, аралаусы; **засту́пник наро́да** халыҡты яҡлаусы

**ЗАСТУ́ПНИЧЕСТВО** *с* яҡлау, ҡурғаусылыҡ, ҡурсыу, ҡурсалау; **засту́пничество друзе́й** дуҫтарҙың яҡлауы

**ЗАСТУЧА́ТЬ** *сов.* шаҡый (туҡылдата, дөбөрләтә) башлау; **застуча́ть в дверь** ишек шаҡый башлау

**ЗАСТЫВА́ТЬ** *несов. см.* **засты́ть**

**ЗАСТЫ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **засты́ть** **2.** *прил.* ҡатҡан, ҡатып ҡалған; **засты́вшая ла́ва** ҡатҡан лава **3.** *прил.*; *разг.* туңған, туң; **засты́вшая река́** туңған йылға **4.** *прил.*; *разг.* өшөгән, өшөп ҡатҡан, ҡатып ҡалған, хәрәкәтһеҙ; **засты́вшие па́льцы** өшөп ҡатҡан бармаҡтар; **засты́вшее выраже́ние** ҡатып ҡалған ҡиәфәт

**ЗАСТЫДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* оялтыу; **застыди́ть ма́льчика** малайҙы оялтыу

**ЗАСТЫДИ́ТЬСЯ** *сов.* оялыу, уңайһыҙланыу; **де́вушка застыди́лась** ҡыҙ оялды

**ЗАСТЫ́НУТЬ** *сов. см.* **засты́ть**

**ЗАСТЫ́ТЬ** и **ЗАСТЫ́НУТЬ** *сов.* **1.** ҡатыу, ҡуйырыу; **клей засты́л** елем ҡатҡан; **сту́день засты́л** тертелдәк ҡатҡан **2.** *разг.* туңыу; **вода́ засты́ла** һыу туңған **3.** *разг.* ныҡ өшөү, туңыу, ҡатыу; **ру́ки засты́ли** ҡулдар ҡатты **4.** ҡатып ҡалыу, хәрәкәтһеҙ туҡтап ҡалыу; **засты́ть на ме́сте от изумле́ния** аптырауҙан урында ҡатып ҡалыу **5.** үҙгәрешһеҙ булыу, ҡатып ҡалыу (*йөҙ, ҡиәфәт һ.б. ҡарата*)

**ЗАСУДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* хөкөм итеү, хөкөмгә (яуапҡа) тарттырыу, ғәйепләү

**ЗАСУЕТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ығы-зығы килеү, ҡабаланып (өтәләнеп, өлтөрәп) китеү, албырғау

**ЗАСУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **засуди́ть**

**ЗАСУ́НУТЬ** *сов. что* **1.** тығыу, тығып ҡуйыу; **засу́нуть ру́ку в карма́н** ҡулды кеҫәгә тығыу **2.** *разг.* (*спрятать*) тығып (йәшереп) ҡуйыу; **засу́нуть письмо́ в я́щик стола́** хатты өҫтәл тартмаһына йәшереп ҡуйыу

**ЗАСУПО́НИВАТЬ** *несов. см.* **засупо́нить**

**ЗАСУПО́НИТЬ** *сов. кого-что* тамаҡбауҙы тартып бәйләү (*ат екkәндә*)

**ЗА́СУХА** *ж* ҡоролоҡ; **борьба́ с за́сухой** ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәш

**ЗАСУХОУСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое ҡоролоҡҡа сыҙамлы, ҡоролоҡҡа бирешмәүсән; **засухоусто́йчивые культу́ры** ҡоролоҡҡа сыҙамлы культуралар

**ЗАСУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **засучи́ть**

**ЗАСУЧИ́ТЬ** *сов. что* һыҙғаныу, төрөү; **засучи́ть рукава́** еңдәрҙе һыҙғаныу ♦ **(де́лать) засучи́в рукава́** *что* ең һыҙғанып (эшләү)

**ЗАСУ́ШИВАТЬ** *несов. от* **засуши́ть**

**ЗАСУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** киптереү, ҡоротоу; **засуши́ть цветы́** сәскәләрҙе киптереү **2.** *перен.*, *разг.* (*лишить живости, выразительности*) йәмен ебәреү, матурлығын бөтөрөү

**ЗАСУШИ́ТЬСЯ** *сов.* кибеү, ҡороу, кибеп (ҡороп) бөтөү

**ЗАСУ́ШЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡоролоҡло, ҡоро, яуым-төшөмһөҙ; **засу́шливый год** ҡоролоҡло йыл **2.** кипкән, ҡыу; **засу́шливая степь** ҡыу дала

**ЗАСЧИТА́ТЬ** *сов. что* ҡушып иҫәпләү (һанау), иҫәпкә индереү (алыу); **засчита́ть мяч при игре́** уйында (ҡапҡаға) индерелгән тупты иҫәпкә алыу; **засчита́ть в счёт до́лга** бурыс иҫәбенә индереү

**ЗАСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **засчита́ть**

**ЗАСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **засла́ть**

**ЗАСЫ́ПАТЬ** *сов.* **1.** *что* күмеү; **засы́пать я́му** соҡорҙо күмеү; **зе́млю засы́пало сне́гом** ер ҡарға күмелде **2.** *кого-что*; *перен.* яуҙырыу, күмеп ташлау; **засы́пать докла́дчиков вопро́сами** докладсыға һорауҙар яуҙырыу **3.** *что, чего*; *разг.* һалыу; **засы́пать ча́ю** сәй һалыу; **засы́пать ло́шади овса́** атҡа һоло һалыу

**ЗАСЫПА́ТЬ I** *несов. см.* **засы́пать**

**ЗАСЫПА́ТЬ II** *несов. см.* **засну́ть**

**ЗАСЫ́ПАТЬСЯ I** *сов.* **1.** (*попасть внутрь*) эскә үтеү, инеп ҡалыу, тулыу; **песо́к засы́пался в сапоги́** итеккә ҡом тулған **2.** *чем* ҡапланыу, ябылыу; **доро́га засы́палась ли́стьями** юл япраҡтар менән ҡапланған

**ЗАСЫ́ПАТЬСЯ II** *сов.*; *прост.* **1.** тотолоу, эләгеү, фашланыу; **разве́дчик засы́пался** разведчик эләккән **2.** (*обнаружить незнание чего-л.*) тота алмау, тапшыра алмау (*имтиханды, һынауҙы*)

**ЗАСЫПА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **засы́паться** I; **2.** *страд. от* **засыпа́ть** I

**ЗАСЫПА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **засы́паться** II

**ЗАСЫПА́ТЬСЯ III** *несов. см.* **заспа́ться**

**ЗАСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **засо́хнуть**

**ЗАТАВРИ́ТЬ** *сов. кого-что* тамға һалыу, келәймә һуғыу (һалыу, баҫыу) **заоаври́ть ло́шадь** атҡа тамға һалыу

**ЗАТАЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*скрываемый*) йәшерен, йәшереп һаҡланған; **затаённая оби́да** йәшерен үпкә; **затаённая печа́ль** йәшерен моңһоулыҡ **2.** (*сохраняемый в тайне*) серле, сер итеп һаҡланған; **затаённые мечты́** сер итеп һаҡланған хыял

**ЗАТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **затаи́ть**

**ЗАТА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затаи́ться** **2.** *страд. от* **зата́ивать**

**ЗАТАИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* йәшереп алып ҡалыу; **затаи́ть де́ньги** аҡсаны йәшереп алып ҡалыу **2.** (йәшереп) һаҡлау, тотоу; **затаи́ть зло́бу** асыу тотоу; **затаи́ть оби́ду** үпкә һаҡлау ♦ **затаи́ть дыха́ние** тын да алмай тороу

**ЗАТАИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** йәшеренеү, боҫоу, ҡасыу; **у́тка затаи́лась в камыша́х** өйрәк ҡамыш араһына йәшеренде **2.** (*скрыть мысли от других*) йәшереү, белгертмәү, һиҙҙермәү

**ЗАТА́ЛКИВАТЬ** *несов. см.* **затолка́ть** 1, 2 и **затолкну́ть**

**ЗАТА́ПЛИВАТЬ I** *несов. см.* **затопи́ть** I

**ЗАТА́ПЛИВАТЬ II** *несов. см.* **затопи́ть** II

**ЗАТА́ПЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **затопи́ться** I; **2.** *страд. от* **зата́пливать** I

**ЗАТА́ПЛИВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **затопи́ться** II; **2.** *страд. от* **зата́пливать** II

**ЗАТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **затопта́ть**

**ЗАТА́СКАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **затаска́ть 2.** *прил.* (*заношенный*) кейелгән, таушалған, иҫкергән, кейеп туҙҙырылған; **зата́сканный костю́м** әрһеҙ кейелгән костюм **3.** *прил.*; *перен.* күп ҡабатлап йәме ебәрелгән, күп сәйнәлгән; **зата́сканный анекдо́т** күп сәйнәлгән анекдот

**ЗАТАСКА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (әрһеҙ) кейеп туҙҙырыу, туҙҙырып бөтөрөү; **затаска́ть пальто́** пальтоны кейеп туҙҙырыу **2.** *что*; *перен.* күп ҡабатлап йәмен ебәреү, ҡыҙығын бөтөрөү (*һүҙҙе һ.б.*) **3.** *кого-что* йөрөтөп интектереп бөтөү, бергә йөрөтөп йонсотоу

**ЗАТАСКА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** туҙып бөтөү, тетелеү (*күп кейеүҙән*) **2.** йонсоу, интегеп бөтөү (*күп йөрөүҙән*); **затаска́ться по суда́м** судҡа күп йөрөүҙән интегеп бөтөү

**ЗАТА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **затащи́ть**, **затаска́ть** 1, 2

**ЗАТА́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затаска́ться 2.** *страд. от* **зата́скивать**

**ЗАТА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **заточи́ть** II

**ЗАТАЩИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һөйрәп индереү, һөйрәп килтереү (ташыу); **затащи́ть до́ски в помеще́ние скла́да** таҡталарҙы складҡа һөйрәп ташыу **2.** (*утащить*) алып китеү, олаҡтырыу; **затащи́ть за у́гол до́ма** өй артына алып китеү **3.** *перен.*, *разг.* (*привести*) алып инеү, индереү; **он затащи́л меня́ домо́й** ул мине өйөнә алып инде

**ЗАТВЕРДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **затверде́ть**

**ЗАТВЕРДЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡатҡан, ҡаты; **затверде́лая по́чва** ҡатҡан тупраҡ

**ЗАТВЕРДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **затверде́ть 2.** *мед.* (*опухоль*) ҡаты шеш

**ЗАТВЕРДЕ́ТЬ** *сов.* ҡатыу, ҡатыланыу, ҡатып ҡалыу; **мозо́ль затверде́ла** һөйәл ҡатҡан

**ЗАТВЕРДИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** бер үк һүҙҙе ҡабатлау (туҡыу, тылҡыу) **2.** ныҡытыу, ятҡа бикләү, ятлап алыу; **затверди́ть стихи́** шиғырҙы ятлап алыу

**ЗАТВЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **затверди́ть** 2

**ЗАТВО́Р** *м* **1.** затвор; **затво́р автома́та** автомат затворы **2.** (*засов*, *запор*) бик, келә, элгес; **затво́р воро́т** ҡапҡа келәһе **3.** япҡыс; **затво́р плоти́ны** быуа япҡысы

**ЗАТВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ябыу, ябып ҡуйыу; **затвори́ть окно́** тәҙрәне ябып ҡуйыу **2.** *кого* бикләү, бикләп ҡуйыу

**ЗАТВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ябылыу; **окно́ затвори́лось** тәҙрә ябылды **2.** бикләнеү, бикләнеп ҡалыу; **затвори́ться в ко́мнате** бүлмәлә бикләнеү

**ЗАТВО́РНИК** *м* **1.** аскет (*һөжрәһенән сыҡмай ятҡан монах*) **2.** кеше менән ҡатнашмай йәшәүсе, кешенән ситләшеүсе; **жить затво́рником** кеше менән ҡатнашмай, ситләшеп йәшәү

**ЗАТВО́РНИЧЕСТВО** *с* үҙ-үҙенә бикләнгәнлек

**ЗАТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **затвори́ть**

**ЗАТВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затвори́ться 2.** *страд. от* **затворя́ть**

**ЗАТЕВА́ТЬ** *несов. см.* **зате́ять**

**ЗАТЕ́ЙЛИВОСТЬ** *ж* хикмәтлелек; **зате́йливость рису́нка** һүрәттең хикмәтлелеге

**ЗАТЕ́ЙЛИВЫЙ,** -ая, -ое *прост.* ҡыҙыҡ, әкәмәт, хикмәтле; **зате́йливое украше́ние** хикмәтле биҙәү; **зате́йливая речь** хикмәтле телмәр; **зате́йливый челове́к** әкәмәт кеше

**ЗАТЕ́ЙНИК** *м* **1.** мәрәкәсе, мәҙәксе; **он большо́й зате́йник** ул бик шәп мәҙәксе **2.** (*организатор развлечений*) уйынсы, уйын ойоштороусы, башлап йөрөүсе

**ЗАТЕ́ЙНИЦА** *ж* мәрәкәсе, мәҙәксе

**ЗАТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **зате́чь**

**ЗАТЕ́М** *нареч.* **1.** (*после этого*, *потом*) һуңынан, унан һуң, аҙаҡ; **снача́ла бы́ло темно́, зате́м посветле́ло** башта ҡараңғы ине, һуңынан яҡтырҙы **2.** (*для этого*) шуның өсөн, шуға күрә; **я зате́м и прие́хал** мин шуның өсөн килдем дә инде **3.** (*для обозначения перехода к следующему положению или выводу в речи*) шунан (*һүҙҙе йомғаҡлағанда йәки икенсе һүҙгә күскәндә ҡулланыла*)

**ЗАТЕМНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **затемни́ть**; **затемне́ние созна́ния** аң томаланыу **2.** ҡараңғылау, ҡаплау; **затемне́ние о́кон** тәҙрәләрҙе ҡаплау **3.** *мед.* ҡара тап; **затемне́ние в лёгких** үпкәләге ҡара тап

**ЗАТЕМНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*начать темнеть*) ҡараңғылана башлау; **в лесу́ затемне́ло** урманда ҡараңғылана башланы **2.** ҡарайып күренеү

**ЗАТЕМНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡараңғылау, томалау; **дым затемни́л не́бо** төтөн күкте томаланы **2.** ҡаплау, ышыҡлау, томалау; **затемни́ть о́кна** тәҙрәләрҙе ҡаплау **3.** томаландырыу, томалау; **затемни́ть созна́ние** аңды томалау **4.** *перен.* йәшереү, башҡа йүнәлешкә бороу; **затемни́ть смысл** *чего-л. нимәнеңдер* мәғәнәһен йәшереү

**ЗАТЕМНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡараңғыланыу; **не́бо затемни́лось** күк ҡараңғыланды **2.** *перен.* буталыу, сыуалыу, томаланыу; **мысль затемни́лась** фекер сыуалды

**ЗА́ТЕМНО** *нареч.*; *разг.* ҡараңғыла, ҡараңғы саҡта, яҡтырмаҫ элек; **просыпа́ться за́темно** яҡтырмаҫ элек уяныу; **ко́нчить рабо́ту за́темно** эште ҡараңғы төшкәс тамамлау

**ЗАТЕМНЯ́ТЬ** *несов. см.* **затемни́ть**

**ЗАТЕМНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затемни́ться 2.** *страд. от* **затемня́ть**

**ЗАТЕНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** күләгәләү, ышыҡлау; **затени́ть расте́ние** үҫемлекте күләгәләү **2.** (*заслонить*) ҡаплау; **затени́ть свет** яҡтылыҡты ҡаплау

**ЗАТЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **затени́ть**

**ЗАТЕ́ПЛИВАТЬ** *несов. см.* **зате́плить**

**ЗАТЕ́ПЛИТЬ** *сов. что* яндырып (тоҡандырып) ебәреү; **зате́плить свечу́** май шәмде тоҡандырып ебәреү

**ЗАТЕ́ПЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** яна башлау, тоҡаныу, ҡабыныу; **ого́нь зате́плился** ут яна башланы **2.** *перен.* уяныу, тоҡаныу; **зате́плилась наде́жда** өмөт уянды

**ЗАТЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* юйыу, юйып ташлау, һөртөп алыу; **затере́ть на́дпись на стене́** стеналағы яҙыуҙы һөртөп алыу **2.** *кого-что* (*сдавить*) ҡыҫыу; **льды затёрли ло́дку** боҙҙар кәмәне ҡыҫты **3.** *что*; *разг.* (*истрепать*) туҙҙырыу, теткеләү (*кейем-һалымды*) **4.** *кого*; *перен.*, *разг.* ҡыҫыу, юл бирмәү; **затёрли молодо́го инжене́ра** йәш инженерға юл бирмәнеләр

**ЗАТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ҡыҫылып инеү, тығылыу; **затере́ться в о́чередь** сиратҡа тығылыу

**ЗАТЕ́РЯННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **затеря́ть 2.** *прил.* онотолған, ташландыҡ; **зате́рянный в лесу́ до́мик** урмандағы ташландыҡ өй

**ЗАТЕРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* юғалтыу, ҡуйып онотоу, ҡайҙалыр ҡуйыу; **затеря́ть кни́гу** китапты юғалтыу

**ЗАТЕРЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** юғалыу; **письмо́ затеря́лось** хат юғалды **2.** инеп юғалыу; **затеря́ться в толпе́** халыҡ араһына инеп юғалыу **3.** юғалып ҡалыу, күренмәү; **дере́вня затеря́лась среди́ гор** ауыл тауҙар араһында юғалып ҡалған

**ЗАТЁС** *м* тамға, билдә (*ағасҡа юнылған*)

**ЗАТЕСА́ТЬ** *сов. что* юныу, юнып йоҡартыу (ослау); **затеса́ть до́ску** таҡтаны юныу; **затеса́ть кол** ҡаҙыҡты юнып ослау

**ЗАТЕСА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ҡыҫылып инеү, тығылыу

**ЗАТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** ағып инеү, һарҡып төшөү; **вода́ затекла́ в по́греб** һыу баҙға һарҡып төшкән **2.** шешеү, ҡабарып сығыу; **у него́ затёк глаз** уның күҙе шешенгән **3.** ойоу (*тән өлөштәренә ҡарата*); **ру́ки затекли́** ҡулдар ойоно

**ЗАТЕ́Я** *ж* **1.** (*замысел, план*) ниәт, уй; **неле́пая зате́я** мәғәнәһеҙ ниәт **2.** (*вымысел*) уйланған нәмә (уй), хыял; **но́вая зате́я** яңы хыял **3.** (*забава*) мәҙәк, мәрәкә, шаянлыҡ, мутлыҡ; **ребя́чья зате́я** балалар мутлығы (эше) ♦ **без зате́й** ябай ғына, мәҙәк-фәлән ҡормай ғына

**ЗАТЕ́ЯТЬ** *сов. что* и *с неопр.*; *разг.* **1.** (*начать, предпринять что-л.*) башлау, башлап ебәреү, тотоноу; **зате́ять разгово́р** һөйләшеүҙе башлап ебәреү; **зате́ять игру́** уйын башлап ебәреү **2.** (*задумать*) ниәтләү, уйлау; **они́ что́-то зате́яли** улар ниҙер эшләргә ниәтләне

**ЗАТЕ́ЯТЬСЯ** *сов.*; *разг.* башланыу, башланып китеү; **зате́ялся разгово́р** һүҙ башланып китте

**ЗАТИРА́ТЬ** *несов. см.* **затере́ть**

**ЗАТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затере́ться 2.** *страд. от* **затира́ть**

**ЗАТИ́СКАТЬ** *сов. кого*; *разг.* **1.** ойпалап бөтөү, ҡыҫҡылап интектереү **2.** эткеләп (төрткөләп) индереү, тығыу; **зати́скать в авто́бус** автобусҡа эткеләп индереү

**ЗАТИ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **зати́скать, зати́снуть**

**ЗАТИ́СНУТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* эткеләп (этеп-төртөп) индереү, тығылдырыу

**ЗАТИ́СНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* этеп-төртөп инеү, ҡыҫылып инеү, тығылыу

**ЗАТИХА́ТЬ** *несов. см.* **зати́хнуть**

**ЗАТИ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** тынып ҡалыу, тыныу, шымыу; **зву́ки зати́хли** тауыштар тынды **2.** экренәйеү, баҫылыу, һүрелеү; **шаги́ зати́хли** аяҡ тауыштары баҫылды **3.** *перен.* тынысланыу, тыныу; **больно́й зати́х** ауырыу тынысланды

**ЗАТИ́ШЬЕ** *с* **1.** (*тишина*) тынлыҡ, тынып тороу; **зати́шье пе́ред грозо́й** йәшен алдынан булған тынлыҡ **2.** (*тихое место*) һил урын, һиллек; **зати́шье пруда́** быуаның һил урыны **3.** (*приостановка действия, события*) тынлыҡ, тыныслыҡ; **зати́шье пе́ред бо́ем** һуғыш алдынан булған тынлыҡ

**ЗАТКА́ТЬ** *сов. что* сүпләмләп һуғыу, туҡыу, сигеү, үреү; **затка́ть пла́тье серебро́м** күлдәккә көмөш (еп) ҡушып туҡыу; **пауки́ затка́ли паути́ной углы́** үрмәкселәр мөйөштәрҙе ау менән үргән

**ЗАТКНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** тығыу, тығып ҡуйыу; **заткну́ть у́ши ва́той** ҡолаҡҡа мамыҡ тығыу **2.** *за что* ҡыҫтырыу, ҡыҫтырып ҡуйыу; **заткну́ть кинжа́л за по́яс** хәнйәрҙе билбауға ҡыҫтырып ҡуйыу ♦ **заткну́ть за по́яс** танауына сиртеү, уҙҙырып ебәреү; **заткну́ть рот** ауыҙын ябыу (ҡаплау, астырмау), өнөн тығыу

**ЗАТКНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ябылыу, тығылыу (*һауыт-һабаға ҡарата*) **2.** *прост.* телде тешләү, ауыҙҙы йомоу, өндәшмәҫ булыу

**ЗАТМЕВА́ТЬ** *несов. см.* **затми́ть**

**ЗАТМЕ́НИЕ** *с* **1.** тотолоу; **затме́ние луны́** ай тотолоу; **со́лнечное затме́ние** ҡояш тотолоу **2.** *разг.* (*помрачение сознания*) аң томаланыу, зиһен таралыу; **на меня́ нашло́ како́е-то затме́ние** әллә ниҙән зиһенем таралып китте

**ЗАТМИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡаплау, томалау, ышыҡлау; **звезду́ затми́ли ту́чи** болоттар йондоҙҙо ҡапланы **2.** *кого-что*; *перен.* өҫтөн сығыу, уҙҙырыу; **затми́ть всех свои́м остроу́мием** йор һүҙлеге менән барыһынан да уҙҙырыу

**ЗАТО́** *союз* (*в значении "однако", "но в то же время"*) ләкин, уның ҡарауы, -һа ла/-һә лә, әммә; **пода́рок недорого́й, зато́ хоро́ший** бүләк ҡиммәтле түгел, әммә яҡшы

**ЗАТОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **затова́рить**

**ЗАТОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затова́рить 2.** *страд. от* **затова́ривать**

**ЗАТОВА́РИТЬ** *сов. что*; *торг.* (һатмай) йыйып яткырыу (тотоу), һатмай тотҡарлау; **затова́рить зерно́** ашлыҡты йыйып яткырыу; **затова́рить склад** келәткә артыҡ тауар туплау

**ЗАТОВА́РИТЬСЯ** *сов.*; *спец.* **1.** кәрәгенән артыҡ туплау (йыйыу, тәьмин итеү) (*тауарҙарҙы*)

2. (*скопиться в большом количестве — о товаре*) күпләп һатылмай ятыу (йыйылып китеү)

**ЗАТОЛКА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* этеп (төртөп) индереү, этkеләп тығылдырыу; **затолка́ть ваго́н в тупи́к** вагонды тупикка этеп индереү **2.** *что* тығыу; **затолка́ть свёрток в карма́н** төйөнсөктө кеҫәгә тығыу **3.** этkеләү, төрткөләү, төрткөләп бөтөрөү

**ЗАТОЛКНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* этеп (төртөп) индереү, этәреп ҡуйыу

**ЗАТО́Н** *м* **1.** (*залив*) ҡултыҡ, ҡолаҡ; **глубоково́дный зато́н** тәрән һыулы ҡултыҡ; **речно́й зато́н** йылға ҡолағы **2.** (*место стоянки, ремонта судов*) затон

**ЗАТОНУ́ТЬ** *сов.* батыу; **кора́бль затону́л** карап батты

**ЗАТОПИ́ТЬ I** *сов. что* яғыу, яғып ебәреү; **затопи́ть пе́чку** мейескә яғып ебәреү

**ЗАТОПИ́ТЬ II** *сов. что* **1.** баҫыу, баҫып китеү; **река́ затопи́ла луга́** йылға болондарҙы баҫҡан **2.** батырыу; **затопи́ть ло́дку** кәмәне батырыу **3.** *перен.* тулыу, тултырыу; **войска́ затопи́ли пло́щадь** майҙанға ғәскәр тулды

**ЗАТОПИ́ТЬ III** *сов.* яға башлау; **в про́шлом году́ затопи́ли в октябре́** үткән йыл октябрҙә яға башланылар

**ЗАТОПИ́ТЬСЯ I** *сов.* яна башлау, яғыла башлау; **печь затопи́лась** мейес яна башланы

**ЗАТОПИ́ТЬСЯ II** *сов.* һыу аҫтында ҡалыу, һыу баҫыу; **берега́ затопи́лись во вре́мя разли́ва** һыу ташҡанда яр буйҙары һыу аҫтында ҡалды

**ЗАТОПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **затопи́ть** II

**ЗАТОПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затопи́ться** II; **2.** *страд. от* **затопля́ть**

**ЗАТОПТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тапап бөтөрөү, тапап тигеҙләү; **затопта́ть траву́** үләнде тапап бөтөрөү **2.** тапап бысратыу; **затопта́ть пол** иҙәнде тапап бысратыу **3.** *что* тапап иҙеү, иҙгеләү; **затопта́ть бума́гу в грязь** ҡағыҙҙы бысраҡка тапап иҙеү **4.** *что* тапап һүндереү; **затопта́ть ого́нь** утты тапап һүндереү **5.** *кого-что* тапап үлтереү, тапау ♦ **затопта́ть в грязь** бысраҡка батырыу, ялған ғәйеп яғыу, нык хурлау

**ЗАТО́Р** *м* **1.** тығылыш, тығын **2.** *перен.* тотҡарлыҡ; **зато́р в рабо́те** эштәге тотҡарлыҡ

**ЗАТОРМА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **затормози́ть**

**ЗАТОРМОЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* туҡтатыу, тормозлау, тормозға баҫыу (һалыу), экренәйтеү; **затормози́ть маши́ну** машинаны тормозлау **2.** *перен.*, *разг.* тотҡарлау, тотҡарлыҡ итеү; **затормози́ть де́ло** эште тотҡарлау

**ЗАТОРМОЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** туҡталып тороу, тормозланыу **2.** *перен.*, *разг.* туҡтап ҡалыу, тотҡарланыу; **рабо́та затормози́лась** эш тотҡарланды

**ЗАТОРМОШИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* өҙгөләү, тартҡылап-йолҡҡолап йонсотоу

**ЗАТОРОПИ́ТЬ** *сов.* ашыҡтырыу, ҡабаландырыу

**ЗАТОРОПИ́ТЬСЯ** *сов.* ашыға (ҡабалана) башлау, ашығыу, ҡабаланыу; **он внеза́пно затoропи́лся** ул ҡапыл ғына ҡабалана башланы

**ЗАТОСКОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* һағына (юҡһына) башлау

**ЗАТОЧЕ́НИЕ** *с*; *уст.* **1.** *см.* **заточи́ть** I; **2.** (*пребывание в тюрьме, ссылке*) тотҡон, һөргөн; **ве́чное заточе́ние** мәңгелек тотҡон

**ЗАТОЧИ́ТЬ I** *сов. кого-что*; *высок.*, *уст.* ябыу, ябып ҡуйыу, ултыртыу; **заточи́ть в тюрьму́** төрмәгә ябыу

**ЗАТОЧИ́ТЬ II** *сов. что* ослау, үткерләү; **заточи́ть каранда́ш** ҡәләм ослау; **заточи́ть нож** бысаҡ үткерләү

**ЗАТОШНИ́ТЬ** *сов. кого безл.* күңел болғана башлау, ҡоҫҡо килеү; **его́ затошни́ло** уның күңеле болғана башланы

**ЗАТРАВИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** баҫтырып (ҡыуып) тотоу, баҫтыртыу, ҡыуҙыртыу; **затрави́ть за́йца** ҡуянды баҫтыртыу **2.** кешене эттән талатыу **3.** *перен.*, *разг.* эҙәрлекләп интектереү, теңкәгә тейеү

**ЗАТРА́ВКА** *ж* **1.** запал, тоҡандырғыс (*тупта, мылтыҡта*) **2.** *перен.*, *прост.* башланғыс (*эште башлау алдынан ҡыҙыҡтырыу*)

**ЗАТРА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **затрави́ть**

**ЗАТРА́ГИВАТЬ** *несов. см.* **затро́нуть**

**ЗАТРАМБОВА́ТЬ** *сов. что* тыңҡыслау, төйөү; **затрамбова́ть зе́млю** ерҙе тыңҡыслау

**ЗАТРАМБО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **затрамбова́ть**

**ЗАТРАПЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* көндәлек, көндәге, көн дә (әрһеҙгә) кейә торған; **затрапе́зная оде́жда** көндәлек кейем

**ЗАТРА́ТА** *ж* **1.** тотоу, тотоноу, түгеү, сарыф итеү (*көс, ваҡыт һ.б. карата*); **затра́та средств** аҡса тотоу; **затра́та вре́мени** ваҡыт сарыф итеү **2.** *обычно мн.* **затра́ты** сығым, тотолған аҡса (мал, бол); **сократи́ть затра́ты на обору́дование** ҡорамалға сығымдарҙы кәметеү

**ЗАТРА́ТИТЬ** *сов. что* **1.** тотоу, тотоноу, һалыу; **затра́тить сре́дства на строи́тельство** төҙөлөшкә аҡса тотоноу **2.** түгеү, һалыу, сарыф итеү; **затра́тить мно́го сил** күп көс түгеү; **затра́тить на пое́здку пять дней** барыуға биш көн сарыф итеү

**ЗАТРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **затра́тить**

**ЗАТРЕ́БОВАТЬ** *сов. кого-что*; *офиц.-дел.* талап итеү, һоратып алыу, саҡыртыу, саҡыртып алыу (килтереү); **затре́бовать спра́вку** белешмә һоратып алыу; **затре́бовать свиде́телей** шаһиттарҙы саҡыртып килтереү

**ЗАТРЕПА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* туҙҙырып (таушалдырып) бөтөрөү; **затрепа́ть кни́жку** китапты таушалдырып бөтөрөү **2.** *кого* (*измучить*) йонсотоп бөтөү, интектереү, хәлдән тайҙырыу

**ЗАТРЕПЕТА́ТЬ** *сов.* дерелдәй (ҡалтырай) башлау, дер-дер килеү

**ЗАТРЕЩА́ТЬ** *сов.* **1.** шытырлай (ярыла) башлау, шытыр-шытыр килеү; **лёд затреща́л** боҙ шытырлай башланы **2.** сырылдаша (сырылдай) башлау, сыр-сыр килеү; **кузне́чики затреща́ли** сиңерткәләр сырылдай башланы **3.** дыңғырлай башлау, дыңғыр-дыңғыр килеү

**ЗАТРЕ́ЩИНА** *ж*; *прост.* яңаҡлау, тондороу, ҡундырыу; **дать затре́щину** яңаҡҡа тондороу

**ЗАТРО́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тейеү, ҡағылыу, тейеп китеү, ҡағылып үтеү; **пу́ля затро́нула кость** пуля һөйәккә тейеп үткән **2.** *что*; *перен.* ҡағылыу, ҡағылып үтеү, әйтеп үтеү; **затро́нуть вопро́с** мәсьәләгә ҡағылып үтеү **3.** *кого-что*; *перен.* йоғонто яһау, тәьҫир итеү, уятыу; **затро́нуть чу́вства** тойғоларға тәьҫир итеү

**ЗАТРУДНЕ́НИЕ** *с* **1.** ҡыйынлыҡ, уңайһыҙлыҡ, ҡамасау; **устрани́ть затрудне́ния** уңайһыҙлыҡтарҙы бөтөрөү **2.** ҡыйын (ауыр) хәл, ауырлыҡ; **быть в затрудне́нии** ҡыйын хәлдә булыу; **вы́вести из затрудне́ния** ауыр хәлдән сығарыу

**ЗАТРУДНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **затрудни́ть 2.** *прил.* ауыр, ауырлашҡан, ҡыйын; **затруднённое дыха́ние** ауыр һулыш

**ЗАТРУДНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ауыр, ҡатмарлы, ҡыйын; **затрудни́тельное положе́ние** ауыр хәл

**ЗАТРУДНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ауырлыҡ (ҡыйынлыҡ) килтереү (төшөрөү), ауыр (ҡыйын) булыу; **затрудни́ть друзе́й** дуҫтарға ауырлыҡ килтереү **2.** *что* ҡыйынлаштырыу, ауырлаштырыу; **затрудни́ть дыха́ние** тын алышын ауырлаштырыу

**ЗАТРУДНИ́ТЬСЯ** *сов. в чём* или *с неопр.* **1.** ауырһыныу, ҡыйынһыныу; **затрудни́ться сказа́ть** әйтергә ҡыйынһыныу **2.** ауырлашыу, ҡыйынлашыу; **его́ положе́ние затрудни́лось** уның хәле ауырлашты

**ЗАТРУДНЯ́ТЬ** *несов. см.* **затрудни́ть**

**ЗАТРУДНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затрудни́ться 2.** *страд. от* **затрудня́ть**

**ЗАТРЯСТИ́** *сов. кого-что* һелкетә башлау, ҡалтырата (дерелдәтә) башлау

**ЗАТРЯСТИ́СЬ** *сов.* ҡалтырана (дерелдәй) башлау, ҡалтырап китеү; **затрясти́сь от стра́ха** ҡурҡыштан ҡалтырана башлау

**ЗАТУЖИ́ТЬ** *сов.*; *трад.-поэт.*, *разг.* ҡайғыра (көйөнә, хәсрәтләнә) башлау

**ЗАТУМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **затума́нить**

**ЗАТУМА́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затума́ниться 2.** *страд. от* **затума́нивать**

**ЗАТУМА́НИТЬ** *сов. что* **1.** (*покрыть туманом*) томан менән ҡаплау, томанлау, боҫлау; **пар затума́нил окно́** пар тәҙрәне боҫланы **2.** *перен.* томалау, ҡараңғылау; **затума́нить мысль** фекерҙе томалау

**ЗАТУМА́НИТЬСЯ** *сов.* **1.** томан менән ҡапланыу, томанланыу, боҫланыу; **со́лнце затума́нилось** ҡояш томан менән ҡапланды **2.** *перен.* томаланыу, ҡараңғыланыу; **созна́ние затума́нилось** аң томаланды **3.** *перен.*, *разг.* моңһоуланыу, күңелһеҙләнеү; **её лицо́ затума́нилось** уның йөҙө моңһоуланды

**ЗАТУПИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (*сделать тупым — об остром предмете*) үтмәҫләү, үтмәҫләндереү, йөҙөн ҡайтарыу, тупаҫлау; **затупи́ть нож** бысаҡты үтмәҫләү

**ЗАТУПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тупаҫланыу, үтмәҫләнеү, йөҙө ҡайтыу; **топо́р затупи́лся** балта тупаҫланған

**ЗАТУПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **затупи́ть**

**ЗАТУПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затупи́ться 2.** *страд. от* **затупля́ть**

**ЗАТУХА́ТЬ** *несов. см.* **зату́хнуть**

**ЗАТУ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** *разг.* (*потухнуть*) һүнеү, һүнеп ҡуйыу; **ого́нь зату́х** ут һүнде **2.** *перен.* (*прекратиться*) туҡталыу, баҫылыу, һүрелеү; **колеба́ния зату́хли** тирбәлеүҙәр баҫылды

**ЗАТУШЕВА́ТЬ** *сов. что* **1.** тушь менән буяу, тушлау; **затушева́ть рису́нок** һүрәтте тушь менән буяу **2.** *перен.* ҡаплау, йәшереп ҡалдырыу; **затушева́ть недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе йәшереү

**ЗАТУШЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **затушева́ть**

**ЗАТУШИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** һүндереү; **затуши́ть свечу́** шәмде һүндереү **2.** *перен.* (*подавить*) баҫыу, күрһәтмәү, туҡтатыу, һүндереү; **затуши́ть ра́дость** ҡыуанысты баҫыу

**ЗА́ТХЛОСТЬ** *ж* **1.** тынсыулыҡ, һөрһөгән (һаҫыған) еҫ; **па́хнет за́тхлостью** һөрһөгән еҫ килә **2.** *перен.* торғонлоҡ, һөрһөү (*ижтимағи тормошҡа ҡарата*)

**ЗА́ТХЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** тынсыу (тонсоу), тонсоҡторғос, һаҫыҡ; **за́тхлый во́здух** тынсыу һауа **2.** күгәргән, һөрһөгән, ҡаҡһыған, еҫләнгән; **за́тхлая мука́** күгәргән он **3.** *перен.* серек, һөрһөгән; **за́тхлая среда́** серек мөхит

**ЗАТЫКА́ТЬ** *несов. см.* **заткну́ть**

**ЗАТЫ́ЛОК** *м* елкә, соңҡа; **почеса́ть заты́лок** елкәне тырнау ♦ **в заты́лок (идти́, стоя́ть, шага́ть и т.п.)** бер-бер артлы (теҙелеү, тороу һ.б.)

**ЗАТЫ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое елкә, соңҡа …ы; **заты́лочная кость** соңҡа һөйәге

**ЗАТЫ́ЧКА** *ж*; *прост.* бөкө, тығын, тыҡҡыс

**ЗАТЮ́КАТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* ҡыйырһытыу, ҡағыу, ситләтеү

**ЗАТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **затяну́ть**

**ЗАТЯ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **затяну́ться 2.** *страд. от* **затя́гивать**

**ЗАТЯ́ЖКА** *ж* **1.** *см.* **затяну́ть** I 1, 2, 6, 7 и **затяну́ться** 1, 2, 5, 6; **2.** (*при курении*) һурыу, әскә тартыу **3.** ҡалыпҡа тартыу (*аяҡ кейемен теккәндә*)

**ЗАТЯЖНО́Й,** -ая, -ое **1.** оҙаҡҡа һуҙылған, оҙайлы; **затяжна́я боле́знь** оҙаҡҡа һуҙылған ауырыу; **затяжно́й дождь** оҙайлы ямғыр ♦ **затяж-**

**но́й прыжо́к** *ав.* оҙайлы һикереү (*парашютты оҙаҡ асмай төшөү*)

**ЗАТЯНУ́ТЬ I** *сов.* **1.** *кого-что* тартып (тарттырып) бәйләү, тарттырыу; **затяну́ть чемода́н ремнём** сумаҙанды ҡайыш менән тарттырып бәйләү **2.** *кого-что* һурыу, тартып алыу, убыу; **боло́то затяну́ло оле́ня** боланды һаҙ упҡан **3.** *кого* тартыу, ылыҡтырыу, индереү; **затяну́ть в спор** бәхәскә ылыҡтырыу **4.** *что, чем* ҡаплау, томалау; **моро́з затяну́л о́зеро льдом** һыуыҡ күлдең өҫтөн боҙ менән ҡапланы; **ту́чи затяну́ли не́бо** күкте болот ҡапланы **5.** *безл.* (*заживить*) уңалыу, бөтәшеү; **ра́ну затяну́ло** яра уңалды **6.** *что* (*задержать*) һуҙыу, оҙаҡҡа (һуҙыу) ебәреү; **затяну́ть де́ло** эште һуҙыу; **затяну́ть собра́ние** йыйылышты оҙаҡҡа һуҙыу **7.** *тех.* тартыу, нығытыу; **затяну́ть болты́ ключо́м** болттарҙы асҡыс менән тартыу

**ЗАТЯНУ́ТЬ II** *сов.*; *разг.* йырлап (һуҙып) ебәреү

**ЗАТЯНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тартып (ҡыҫып) бәйләү; **затяну́ться кушако́м** билбауҙы тартып бәйләү **2.** тартылыу, бәйләнеү, быуылыу; **у́зел затяну́лся** төйөн тартылды **3.** ҡапланыу, томаланыу; **не́бо затяну́лось ту́чами** күк йөҙө болот менән ҡапланды **4.** бөтәшеү, уңалыу; **ра́на затяну́лась** яра уңалды **5.** һуҙылыу, оҙаҡҡа һуҙылып китеү; **собра́ние затяну́лось** йыйылыш оҙаҡҡа һуҙылды **6.** һурыу, эскә тартыу (*төтөндө*)

**ЗАУЛЫБА́ТЬСЯ** *сов.* йылмайыу, йылмайып ебәреү

**ЗАУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аңлайышһыҙ, артыҡ хикмәтле; **зау́мные стихи́** артыҡ хикмәтле шиғырҙар; **зау́мная речь** аңлайышһыҙ телмәр

**ЗА́УМЬ** *ж* мәғәнәһеҙлек, хикмәт

**ЗАУНЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое һағышлы, яманһыу, моңһоу; **зауны́вная пе́сня** һағышлы йыр

**ЗАУПОКО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое; *церк.* йыназа ...ы, ерләү ...ы; **заупоко́йная моли́тва** йыназа доғаһы

**ЗАУПРЯ́МИТЬСЯ** *сов.* ҡарышыу, тиҫкәреләнеү, киреләнеү; **дитя́ заупря́милось** сабый тиҫкәреләнә башланы

**ЗАУРЯ́Д-...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "дипломһыҙ", "чинһыҙ вазифа биләүсе" мәғәнәләрен белдергән беренсе өлөшө, мәҫ.*, **зауря́д-врач** дипломһыҙ табип (врач); **зауря́д-хору́нжий** хорунжий вазифаһындағы һалдат

**ЗАУРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое урта(са), уртаҡул, ябай, ғәҙәти; **зауря́дный актёр** уртаҡул актёр

**ЗАУСЕ́НЕЦ** *м*; *уст. см.* **заусе́ница**

**ЗАУСЕ́НИЦА** *ж* **1.** шайтан тырнағы; **па́льцы в заусе́ницах** шайтан тырнаҡлы бармаҡтар **2.** *тех.* суғырмаҡ, ҡытыршы

**ЗАУ́ТРЕНЯ** *ж* иртәнге ғибәҙәт (*христиан дине буйынса*)

**ЗАУТЮ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **заутю́жить**

**ЗАУТЮ́ЖИТЬ** *сов. что* үтекләү, яҙыу; **заутю́жить скла́дку** кейемдең сырышын үтекләү

**ЗАУ́ЧИВАНИЕ** *с см.* **зау́чивать**; **зау́чивание стихотворе́ния** шиғырҙы ятлау

**ЗАУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **заучи́ть**

**ЗАУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **заучи́ться** **2.** *страд. от* **зау́чивать**

**ЗАУЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ятлау, ятҡа бикләү, ятлап алыу; **заучи́ть пра́вило** ҡағиҙәне ятлау **2.** *кого-что*; *разг.* (*замучить учёбой*) уҡыта-уҡыта алйытыу (йонсотоу)

**ЗАУЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ уҡыуҙан арыу, уҡыу менән ныҡ мауығыу

**ЗАУША́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* тупаҫ, мыҫҡыллы; **зауша́тельская кри́тика** тупаҫ тәнҡит

**ЗАУША́ТЕЛЬСТВО** *с*; *книжн.* тупаҫлыҡ, мыҫҡыллы тәнҡит

**ЗАУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое ҡолаҡ арты(ндағы); **зау́шный нары́в** ҡолаҡ арты шеше

**ЗАФАРШИРОВА́ТЬ** *сов. что* фаршлау, фарш тултырыу; **зафаршировáть у́тку** өйрәкте фаршлау

**ЗАФИКСИ́РОВАТЬ** *сов. что* **1.** (*запечатлеть в рисунке, фотографии и т.п.*) фотоға (ҡағыҙға) төшөрөп ҡуйыу **2.** (*отметить, учесть*) билдәләү, иҫәпкә алыу, яҙып (теркәп) ҡуйыу **3.** *фото.* фиксажлау, фиксаж менән нығытыу; **зафикси́ровать сни́мок** фотоһүрәтте фиксажлау

**ЗАФОНТАНИ́РОВАТЬ** *сов.*; *спец.* фонтан (булып) ата башлау; **сква́жина зафонтани́ровала** скважина фонтан булып ата башланы

**ЗАФРАХТОВА́ТЬ** *сов. что*; *мор.*, *торг.* фрахтовкалау, йөк ташыу өсөн яллау (*судноны*)

**ЗАФРАХТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **зафрахтова́ть**

**ЗАХА́ЖИВАТЬ** *несов.*; *разг.* ингеләү, ингеләп йөрөү; **заха́живайте к нам** беҙгә ингеләп йөрөгөҙ

**ЗАХАНДРИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* күңелһеҙләнеү, бошона (кәйефһеҙләнә) башлау

**ЗАХА́ЯТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* яманатын һатыу, хурлау, әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдырыу

**ЗАХВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **захвали́ть**

**ЗАХВАЛИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* артыҡ маҡтап ташлау (ебәреү), үтә маҡтап шаштырыу (осондороу), ҡотортоп ебәреү; **захвали́ть ученика́** уҡыусыны артыҡ маҡтап ташлау

**ЗАХВА́Т** *м* **1.** *см.* **захвати́ть** 1, 3; **захва́т инициати́вы** инициативаны үҙеңә алыу; **захва́т чужи́х земе́ль** сит ерҙәрҙе баҫып алыу **2.** (*охватываемое чем-л. пространство*) алым; **захва́т плу́га** һабандың алымы; **ширина́ захва́та** алым киңлеге

**ЗАХВАТА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡулдан-ҡулға йөрөтөп бысратып бөтөү, тотҡолап бысратыу; **захвата́ть ру́копись** ҡулъяҙманы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп бысратыу

**ЗАХВАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*, *чего* тотоп (эләктереп) алыу, нык итеп тотоу; **захвати́ть пальто́ за воротни́к** пальто яғаһынан эләктереп алыу **2.** *кого-что* алыу, алып барыу; **захвати́ть сы́на в теа́тр** ул(ың)ды театрға бергә алыу **3.** *кого-что* баҫып (тартып) алыу, алыу, эләктереү; **захвати́ть чужи́е зе́мли** сит ерҙәрҙе баҫып алыу; **захвати́ть власть** власты тартып алыу **4.** *что*; *перен.*, *разг.* эләктереү, йоҡтороу; **захвати́ть корь** ҡыҙылса эләктереү **5.** *кого-что*; *перен.* (*сильно увлечь*) үҙенә тартыу, нык ҡыҙыҡтырыу, йәлеп итеү; **рабо́та захвати́ла его́ целико́м** эш уны тулыһынса үҙенә йәлеп итте. **6.** *разг.* (*застичь*) эләктереү, эләгеү, тотоп алыу; **дождь захвати́л нас** беҙ ямғырға эләктек ♦ **дух захвати́ло** тын ҡыҫылды (бөттө)

**ЗАХВА́ТНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое баҫып алыу ...ы; **захва́тнические во́йны** баҫып алыу һуғыштары

**ЗАХВА́ТЧИК** *м* илбаҫар, баҫып алыусы

**ЗАХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **захвати́ть**

**ЗАХВА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **захва́тывать 2.** *прил.* ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс; **захва́тывающий расска́з** мауыҡтырғыс хикәйә

**ЗАХВОРА́ТЬ** *сов.*; *разг.* ауырып китеү, ауырый башлау

**ЗАХИРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*о человеке*) бөтөп китеү, ябығыу, хәлһеҙләнеү; (*о растениях*) һулыу, шиңеү **2.** *перен.* хөртәйеү, һүнеү, бөтөү; **сад захире́л** баҡса хөртәйҙе

**ЗАХИХИ́КАТЬ** *сов.* хихылдау, хихылдап көлөп ебәреү, хихылдай башлау

**ЗАХЛАМИ́ТЬ** *сов.* *что*; *разг.* ҡыйлау, сүпләү, сүп-сар менән тултырыу

**ЗАХЛАМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **захлами́ть 2.** *прил.* сүп-сарлы, ҡыйлы; **захламлённый коридо́р** сүп-сар менән тулған коридор

**ЗАХЛАМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **захлами́ть**

**ЗАХЛЕБНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тонсоғоу, сәсәү, сәсәп китеү; **захлебну́ться водо́й** һыуға сәсәп китеү **2.** *перен.* туҡталыу; **ата́ка захлебну́лась** атака туҡталды **3.** һүнеү, туҡтау, тынып ҡалыу (*мотор, автомат һ.б. ҡарата*)

**ЗАХЛЁБЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **захлебну́ться 2.** тын ҡыҫылыу, быуылыу; **он захлёбывался от сме́ха** көлөүҙән тыны ҡыҫылды; **захлёбываться от слёз** йәшкә быуылыу **3.** *перен.* йотлоғоп (тын да алмай) уҡыу, музыка тыңлау

**ЗАХЛЕСТА́ТЬ I** *сов. кого-что*; *разг.* ҡамсылау, һыҙырыу; **захлеста́ть ло́шадь** атты ҡамсылау

**ЗАХЛЕСТА́ТЬ II** *сов.*; *разг.*, *в разн. знач.* (*плетью*) һыҙыра (яра, ҡамсылай) башлау; (*о дожде*) һыҙырып яуа башлау; (*о волнах*) һуға башлау; **дождь захлеста́л** ямғыр һыҙырып яуа башланы

**ЗАХЛЕСТНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** эләктереү, эләктереп (салып) алыу; **захлестну́ть петлёй** элмәкләп эләктереп алыу **2.** (*обдать*) аша бәреү, ҡойондороу, килтереп һуғыу; **волна́ захлестну́ла ло́дку** тулҡын кәмәне аша һуҡты **3.** *перен.* тотош биләү, үҙенә тартыу, уятыу; **револю́ция захлестну́ла ма́ссы** революция массаларҙы биләп алды

**ЗАХЛЁСТЫВАТЬ I** *несов. см.* **захлеста́ть** I

**ЗАХЛЁСТЫВАТЬ II** *несов. см.* **захлестну́ть**

**ЗАХЛО́ПАТЬ** *сов.* ҡул саба (алҡышлай) башлау

**ЗАХЛО́ПНУТЬ** *сов.* **1.** *что* шап (шарт) иттереп ябыу; **захло́пнуть дверь** ишекте шап иттереп ябыу **2.** *кого* (*поймать чем-л.*) эләктереү, ҡаптырыу; **захло́пнуть за́йца в капка́н** ҡуянды ҡапҡанға эләктереү

**ЗАХЛО́ПНУТЬСЯ** *сов.* шап итеп ябылыу; **дверь захло́пнулась** ишек шап итеп ябылды

**ЗАХЛОПОТА́ТЬ** *сов.* юллай башлау, юлларға тотоноу

**ЗАХЛОПОТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* мәшәҡәтләнеп арыу, ниҙелер юллап йөрөп интегеү

**ЗАХЛО́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **захло́пнуть**

**ЗАХЛО́ПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **захло́пнуться 2.** *страд. от* **захло́пывать**

**ЗАХМЕЛЕ́ТЬ** *сов.* иҫереү, иҫереп китеү

**ЗАХНЫ́КАТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*начать жаловаться*) һыҡрана башлау, мыжып һөйләнә (зарлана) башлау **2.** (*заплакать*) шыңшып илай башлау, һыңҡылдау, шыңшыу

**ЗАХО́Д** *м* **1.** *см.* **зайти́** 1—5; **захо́д корабля́ в порт** караптың портҡа инеүе **2.** байыу; **захо́д со́лнца** ҡояш байыуы

**ЗАХОДИ́ТЬ I** *несов. см.* **зайти́**

**ЗАХОДИ́ТЬ II** *сов.* ҡүтәрелеү, йөрөй башлау; **по мо́рю заходи́ли во́лны** диңгеҙҙә тулҡындар ҡүтәрелде

**ЗАХОЛУ́СТНЫЙ,** -ая, -ое тын, аулаҡ; **захолу́стное ме́сто** аулаҡ урын

**ЗАХОЛУ́СТЬЕ** *с* **1.** тын (тыныс, аулаҡ) урын (*үҙәктән ситтәге*); **жить в захолу́стье** аулаҡ урында йәшәү **2.** ҡала ситe; **захолу́стье Москвы́** Мәскәүҙең ситe

**ЗАХОРОНЕ́НИЕ** *с*; *книжн.*, *спец.* **1.** *см.* **захорони́ть**; **спо́соб захороне́ния** күмеү ысулы (тәртибе) **2.** ҡәбер(лек); **раско́пки захороне́ний** ҡәберлектәрҙе ҡаҙыу

**ЗАХОРОНИ́ТЬ** *сов.* *кого-что* ерләү, күмеү; **захорони́ть поко́йника** мәйетте ерләү

**ЗАХОТЕ́ТЬ** *несов.* *чего* и *с неопр.* теләү, -ғы/-ге килеү; **захоте́ть пить** эске килеү

**ЗАХОТЕ́ТЬСЯ** *сов.* *безл.* теләү, -ғы/-ге килеү; **мне захоте́лось есть** минең ашағы килде

**ЗАХОХОТА́ТЬ** *сов.* шарҡылдап (хахылдап) көлөп ебәреү

**ЗАХРАПЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ғырылдай (хырылдай, ғырлай) башлау, ғырлап йоҡоға китеү

**ЗАХРЕБЕ́ТНИК** *м*; *презр.* әрәмтамаҡ

**ЗАХРИПЕ́ТЬ** *сов.* ғыжылдай башлау

**ЗАХРОМА́ТЬ** *сов.* аҡһай (сатанлай) башлау

**ЗАХУДА́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** бөлгән, бөлгөнлөккә төшкән, ярлыланған; **захуда́лое хозя́йство** бөлгән хужалыҡ **2.** әһәмиәтһеҙ, ташландыҡ; **захуда́лая дере́вня** ташландыҡ ауыл **3.** *прост.* ябыҡ, яшыҡ; **захуда́лая ло́шадь** ябыҡ ат

**ЗАЦВЕСТИ́ I** *сов.* **1.** (*о стоячей воде*) йәшәреү, ләм баҫыу, бәҫәреү **2.** *разг.* (*покрыться плесенью*) күгәреп бөтөү, күгәреү, йәшәреү; **ко́рки хле́ба зацвели́** икмәк һыныҡтары күгәргән

**ЗАЦВЕСТИ́ II** *сов.* сәскә ата башлау, сәскәләнә (сәскә асыла) башлау

**ЗАЦВЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **зацвести́** I

**ЗАЦВЕТА́ТЬ II** *несов. см.* **зацвести́** II

**ЗАЦЕЛОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡат-ҡат үбеү, үбә башлау, үпкеләү

**ЗАЦЕМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов. что* цемент менән нығытыу, цементлау

**ЗАЦЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** эләктереү, эләктереп алыу; **зацепи́ть багро́м** багор менән эләктереү **2.** *за что* бәрелеү, һөрлөгөү, эләгеү; **зацепи́ть ного́й за поро́г** аяҡ менән тупһаға эләгеү **3.** *перен.*, *разг.* тейеү, ҡағылыу, төрттөрөү; **зацепи́ть эпигра́ммой** эпиграмма менән төрттөрөү

**ЗАЦЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** эләгеү; **пла́тье зацепи́лось за гвоздь** күлдәк сөйгә эләкте **2.** *разг.* (*ухватиться*) тотоноу, йәбешеү

**ЗАЦЕ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **зацепи́ть** 1; **2.** *разг.* элмә, эләктергес, ырғаҡ **3.** *перен.*, *разг.* терәк, таяныс **4.** *перен.*, *разг.* ҡамасау, тотҡарлыҡ; **заце́пка в де́ле** эштәге тотҡарлыҡ

**ЗАЦЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **зацепи́ть**

**ЗАЦЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зацепи́ться** **2.** *страд. от* **зацепля́ть**

**ЗАЧАРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** сихырлау, арбау **2.** *перен.* һоҡландырыу, хайран (таң) ҡалдырыу; **зачарова́ть мело́дией кура́я** ҡурай моңо менән хайран ҡалдырыу

**ЗАЧАРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **зачарова́ть**

**ЗАЧАСТИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*участиться*) көсәйеү, шәбәйеү; **дождь зачасти́л** ямғыр шәбәйҙе **2.** *к кому* йышайыу, йыш килә (башлау); **зачасти́ть в го́сти** ҡунаҡҡа йыш йөрөй башлау

**ЗАЧАСТУ́Ю** *нареч.*; *разг.* йыш ҡына, йыш-йыш, күп ваҡыт; **зачасту́ю так и быва́ет** йыш ҡына шулай була

**ЗАЧА́ТИЕ** *с см.* **зача́ть** I

**ЗАЧА́ТОК** *м* **1.** яралғы, бәбәк, орлоҡ **2.** *биол.* (*рудимент*) ҡалдыҡ **3.** *обычно мн.* **зача́тки** башланғыс, тәүге күренеш, яралғы; **зача́тки но́вых отноше́ний** яңы мөнәсәбәттәрҙең башланғысы

**ЗАЧА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое башланғыс хәлдәге, яралғы хәлендәге; **зача́точный о́рган** яралғы хәлендәге ағза

**ЗАЧА́ТЬ I** *сов. кого* балаға (ауырға, буйға) ҡалыу (уҙыу)

**ЗАЧА́ТЬ II** *сов. что*; *прост.* (*начать*) башлау, башлап ебәреү

**ЗАЧА́ХНУТЬ** *сов.* (*о человеке*) кибеү, ябығыу, хәлһеҙләнеү; (*о растениях*) шиңеү, һулыу, кибеп (ҡороп) бөтөү

**ЗАЧЕ́М** *нареч.* ниңә, ни өсөн; **заче́м пришёл?** ниңә килдең?; **вот заче́м он пришёл** бына ни өсөн килгән икән ул

**ЗАЧЕ́М-ТО** *нареч.* ниңәлер, ни өсөндөр

**ЗАЧЕРВИ́ВЕТЬ** *сов.* ҡортлау, ҡорт төшөү (баҫыу); **я́блоко зачерви́вело** алмаға ҡорт төшкән

**ЗАЧЁРКИВАТЬ** *несов. см.* **зачеркну́ть**

**ЗАЧЕРКНУ́ТЬ** *сов. что* һыҙыу, һыҙып ташлау; **зачеркну́ть строку́** юлды һыҙып ташлау

**ЗАЧЕРНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** (*выделиться чёрным цветом*) ҡарайыу, ҡарайып күренеү, ҡара булып тороу; **вдали́ зачерне́ла ло́дка** алыҫтан кәмә ҡарайып күренде **2.** (*начать чернеть*) ҡарая башлау, ҡара төҫкә инә башлау

**ЗАЧЕРНИ́ТЬ** *сов. что* ҡарайтыу, ҡараға буяу

**ЗАЧЕРНЯ́ТЬ** *несов. см.* **зачерни́ть**

**ЗАЧЕРПНУ́ТЬ** *сов. что*, *чего* һирпеп (һоҫоп, сумырып) алыу; **зачерпну́ть воды́** һыуҙы һирпеп алыу

**ЗАЧЕРПНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һоҫолоу, һирпелеп (һоҫолоп) сығыу (алыныу)

**ЗАЧЕ́РПЫВАТЬ** *несов. см.* **зачерпну́ть**

**ЗАЧЕ́РПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зачерпну́ться** **2.** *страд. от* **заче́рпывать**

**ЗАЧЕРСТВЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҫкергән, ҡатҡан; **зачерстве́лый хлеб** иҫкергән ҡатҡан икмәк **2.** *перен.* күңеле ҡатҡан, ҡаты бәғерле, ҡаты, мәрхәмәтһеҙ; **зачерстве́лый челове́к** ҡаты кеше

**ЗАЧЕРСТВЕ́ТЬ** *сов.* **1.** иҫкереү, ҡатыу; **хлеб зачерстве́л** икмәк иҫкергән **2.** *перен.* күңел ҡатыу, ҡаты бәғерле (мәрхәмәтһеҙ) булыу; **се́рдце зачерстве́ло** күңел ҡатҡан

**ЗАЧЕРТИ́ТЬ** *сов.* һыҙғылап бөтөрөү, һыҙып ташлау (тултырыу); **зачерти́ть лист бума́ги** ҡағыҙ битен һыҙғылап бөтөрөү

**ЗАЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **зачерти́ть**

**ЗАЧЁС** *м* сәс ятышы (*тарағандан һуң*); **гла́дкий зачёс** шыма таралған сәс

**ЗАЧЕСА́ТЬ** *сов. что* тарап ятҡырыу, тарап ҡуйыу; **зачеса́ть во́лосы наза́д** сәсте артҡа тарап ҡуйыу

**ЗАЧЕСА́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* (*пригладить волосы, причесать в каком-л. направлении*) тарап (һыпырып) ҡуйыу

**ЗАЧЕСА́ТЬСЯ II** *сов.* (*начать чесаться*) тырнана (ҡысына) башлау

**ЗАЧЕ́СТЬ** *сов. что* **1.** иҫәпләү, иҫәбенә индереү; **заче́сть сто рубле́й в упла́ту до́лга** йөҙ һумды бурыс иҫәбенә индереү **2.** (*признать выполненным*) зачёт ҡуйыу; **заче́сть практи́ческие заня́тия** практик дәрестәргә зачёт ҡуйыу



13 зак. 2.0084.05

**ЗАЧЕ́СТЬСЯ** *сов.* иҫәпләнеү, иҫәпкә алыныу; **добро́ зачтётся** изгелек иҫәпкә алыныр; **взно́сы бу́дут зачтены́ в упла́ту до́лга** взностар бурыс түләүгә иҫәпләнәсәк

**ЗАЧЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **зачеса́ть**

**ЗАЧЁСЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зачеса́ться** I; **2.** *страд. от* **зачёсывать**

**ЗАЧЁТ** *м* **1.** *см* **заче́сть** 1; **2.** зачёт; **гото́виться к зачёту** зачётҡа әҙерләнеү; **поста́вить зачёт** зачёт ҡуйыу

**ЗАЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое зачёт ...ы; **зачётная кни́жка** зачёт кенәгәһе

**ЗАЧИ́Н** *м* **1.** *прост.* башланғыс **2.** *лит.* баш; **зачи́н ска́зки** әкиәттең башы

**ЗАЧИНА́ТЕЛЬ** *м* башлаусы, башлап ебәреүсе; **зачина́тель но́вого направле́ния в му́зыке** музыкала яңы йүнәлеште башлаусы

**ЗАЧИНА́ТЬ I** *несов. см.* **зача́ть** I

**ЗАЧИНА́ТЬ II** *несов. см.* **зача́ть** II

**ЗАЧИНИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*заделать*) ямау, ямап ҡуйыу, төҙәтеү, төҙәтеп ҡуйыу; **зачини́ть брю́ки** салбарҙы ямау; **зачини́ть кры́шу** ҡыйыҡ(ты) төҙәтеү **2.** (*заострить*) ослау, ослап ҡуйыу; **зачини́ть каранда́ш** ҡәләм ослау

**ЗАЧИ́НЩИК** *м* и **ЗАЧИ́НЩИЦА** *ж* ҡотортоусы, башлап ебәреүсе; **зачи́нщик дра́ки** һуғышты башлап ебәреүсе

**ЗАЧИСЛЕ́НИЕ** *с см.* **зачи́слить** — **зачисля́ть**; **зачисле́ние в штат** штатҡа алыу

**ЗАЧИ́СЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* алыу, ҡабул итеү; **зачи́слить в институ́т** институтҡа алыу **2.** *что*; *бухг.* яҙып ҡуйыу, индереү; **зачи́слить на теку́щий счёт** ағымдағы иҫәпкә яҙып ҡуйыу

**ЗАЧИ́СЛИТЬСЯ** *сов.* ҡабул ителеү, алыныу; **зачи́слиться в аспиранту́ру** аспирантураға алыныу

**ЗАЧИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **зачи́слить**

**ЗАЧИСЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **зачи́слиться** **2.** *страд. от* **зачисля́ть**

**ЗАЧИ́СТИТЬ** *сов. что*; *спец.* таҙартыу, шымартыу; **зачи́стить гра́ни** ҡырҙарын таҙартыу

**ЗАЧИТА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*огласить*) уҡый башлау, уҡып биреү (ишеттереү); **зачита́ть протоко́л** протоколды уҡып ишеттереү **2.** *разг.* (*читая, истрепать*) уҡый-уҡый туҙҙырыу (таушалдырыу)

**ЗАЧИТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* онотолоп (йотолоп) уҡыу, мауығып (бирелеп) уҡыу; **зачита́ться рома́ном** романды онотолоп уҡыу

**ЗАЧИ́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **заче́сть**

**ЗАЧИ́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **зачита́ть**

**ЗАЧИ́ТЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **заче́сться** **2.** *страд. от* **зачи́тывать** I

**ЗАЧИ́ТЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **зачита́ться** **2.** *страд. от* **зачи́тывать** II

**ЗАЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **зачи́стить**

**ЗАЧУМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое тағун (чума) йоҡторған, тағун (чума) менән зарарланған; **зачумлённое живо́тное** чума йоҡторған хайуан

**ЗАЧУ́ЯТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* һиҙеү, һиҙеп алыу (ҡалыу); **зверь зачу́ял охо́тника** йәнлек һунарсыны һиҙеп алды (ҡалды)

**ЗАШАГА́ТЬ** *сов.* атлап китеү, йөрөй башлау; **ребёнок зашага́л** бала атлап китте

**ЗАША́РКАТЬ** *сов. что*; *разг.* тапап бысратыу, тапап бөтөрөү; **пол заша́ркали** иҙәнде тапап бөтөргәндәр

**ЗАШВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **зашвырну́ть**, **зашвыря́ть**

**ЗАШВЫРНУ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ырғытып ебәреү, быраҡтырыу, ташлау, ырғытыу, бәреү, атып бәреү; **зашвырну́ть па́лку** таяҡты ырғытып ебәреү

**ЗАШВЫРЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* яуҙырыу, бәргесләү, туплау; **зашвыря́ть камня́ми** таш менән бәргесләү

**ЗАШЕВЕЛИ́ТЬ** *сов. что, чем* ҡыймылдата (ҡыбырлата, һелкетә) башлау, ҡуҙғатыу; **зашевели́ть па́льцами** бармаҡтарҙы ҡыймылдата башлау

**ЗАШЕВЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыбырлай (ҡыймылдай, һелкенә) башлау, хәрәкәткә килеү; **ли́стья зашевели́лись** япраҡтар һелкенә башланы

**ЗАШЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое муйын артын(дағы)

**ЗАШЕЛЕСТЕ́ТЬ** *сов. чем* и *без доп.* ҡыштырлай башлау, ҡыштыр-ҡыштыр килеү; **ли́стья зашелесте́ли** япраҡтар ҡыштырлай башланы

**ЗАШЕПТА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* шыбырлау, бышылдау, быш-быш (шыбыр-шыбыр) килеү; **зашепта́ть на́ ухо** ҡолаҡҡа шыбырлау

**ЗАШЕПТА́ТЬСЯ** *сов.* шыбырлашыу, бышылдашыу, быш-быш (шыбыр-шыбыр) килеү

**ЗАШЕРША́ВЕТЬ** *сов.* ҡытыршыланыу, ҡытыршыға әйләнеү

**ЗАШИБА́ТЬ** *несов.*; *прост. см.* **зашиби́ть**

**ЗАШИБИ́ТЬ** *сов.*; *прост. кого-что* **1.** һуғыу, төкөү, бәреү, имгәтеү, имгәтә һуғыу; **зашиби́ть но́гу** аяҡты имгәтеү **2.** һуғып (бәреп) үлтереү; **зашиби́ть у́тку** өйрәкте һуғып үлтереү **3.** *перен.* (*добыть, заработать*) аҡса һуғыу, ҡайырып алыу, мал табыу; **зашиби́ть миллио́н** миллионды ҡайырып алыу

**ЗАШИВА́ТЬ** *несов. см.* **заши́ть**

**ЗАШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ямау, ямап ҡуйыу; **заши́ть мешо́к** тоҡто ямап ҡуйыу **2.** *во что* тегеү, тегеп ҡуйыу; **заши́ть письмо́ в карма́н** хатты кеҫәгә тегеп ҡуйыу **3.** *спец.* көпләү, көпләп ҡуйыу, ҡаплау; **заши́ть дыру́ до́сками** тишекте таҡта менән көпләү

**ЗАШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* (эште) башҡарып өлгөрмәү, етешә алмау

**ЗАШИФРОВА́ТЬ** *сов. что* шифрлау, шифр менән яҙыу; **зашифрова́ть радиогра́мму** радиограмманы шифрлау

**ЗАШИФРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **зашифрова́ть**

**ЗАШНУРОВА́ТЬ** *сов. что* шнурлау, шнур менән бәйләү; **зашнурова́ть боти́нки** ботинканы шнурлау

**ЗАШНУРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **зашнурова́ть**

**ЗАШПАКЛЕВА́ТЬ** *сов. что* һылап тигеҙләү, һыҙлыҡлау (шпаклёвкалау); **зашпаклева́ть ще́ли** ярыҡтарҙы һыҙлыҡлау

**ЗАШПАКЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **зашпаклева́ть**

**ЗАШПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **зашпи́лить**

**ЗАШПИ́ЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡыҫтырғыс (төйрәүес, шпилька) ҡаҙап (ҡыҫтырып) ҡуйыу (нығытыу); **зашпи́лить во́лосы** сәскә ҡыҫтырғыс ҡаҙау

**ЗАШТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* (*внештатный*) штаттан тыш; **зашта́тный чино́вник** штаттан тыш чиновник **2.** *перен.* (*второстепенный, незначительный*) әһәмиәтһеҙ, кәрәкһеҙ, икенсел; **зашта́тная до́лжность** әһәмиәтһеҙ вазифа

**ЗАШТЕМПЕЛЕВА́ТЬ** *сов. что* штемпель һуғыу (баҫыу); **заштемпелева́ть дета́ль** деталгә штемпель һуғыу; **заштемпелева́ть ма́рку** маркаға штемпель һуғыу

**ЗАШТО́ПАТЬ** *сов. что* йүрмәп сығыу; **зашто́пать носки́** ойоҡбашты йүрмәп сығыу

**ЗАШТО́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **зашто́пать**

**ЗАШТО́РИВАТЬ** *несов. см.* **зашто́рить**

**ЗАШТО́РИТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡорғанлау, ҡорған элеү (тартыу, төшөрөү)

**ЗАШТРИХОВА́ТЬ** *сов. что* штрихлау, штрихлап һыҙыу, һыҙмалау

**ЗАШТРИХО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **заштрихова́ть**

**ЗАШТУКАТУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **заштукату́рить**

**ЗАШТУКАТУ́РИТЬ** *сов. что* штукатурлау, штукатурлап сығыу; **заштукату́рить сте́ну** стенаны штукатурлап сығыу

**ЗАШТУКОВА́ТЬ** *сов. что*; *спец.* йөйөн йәшереп (йөйһөҙ итеп) тегеү, типсеп сығыу; **заштукова́ть мешо́к** тоҡтоң йөйөн йәшереп тегеү

**ЗАШТУКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **заштукова́ть**

**ЗАШУМЕ́ТЬ** *сов.* шаулай башлау, шаулап китеү; **де́ти зашуме́ли** балалар шаулай башланы

**ЗАЩЕБЕТА́ТЬ** *сов.* **1.** сырҡылдаша (сутылдаша) башлау, сыр-сыр килеү; **пти́цы защебета́ли** ҡоштар сырҡылдаша башланы **2.** *перен.* сөкөрҙәшә (тәтелдәшә) башлау; **де́ти защебе́тали** балалар сөкөрҙәшә башланы

**ЗАЩЕКОТА́ТЬ** *сов. кого* ҡытыҡлай башлау, ҡытыҡлап һенен ҡатырыу (алйытыу, хәлен алыу)

**ЗАЩЁЛКА** *ж* **1.** *разг.* (*щеколда*) келә, шылдырма, шыуҙырма **2.** (*запирающая часть в каком-л. механизме*) элмәк, бик; **защёлка у замка́** йоҙаҡ биге

**ЗАЩЁЛКАТЬ** *сов.* **1.** сутылдай (сут-сут итә) башлау; **солове́й защёлкал** һандуғас сутылдай башланы **2.** *чем* шартлата (шартылдата) башлау; **защёлкать па́льцами** бармаҡтарҙы шартлата башлау

**ЗАЩЁЛКИВАТЬ** *несов. см.* **защёлкнуть**

**ЗАЩЁЛКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **защёлкнуться** **2.** *страд. от* **защёлкивать**

**ЗАЩЁЛКНУТЬ** *сов. что* шалт (сылт, шарт, шылт) итеп бикләү (ябыу); **защёлкнуть дверь** ишекте шарт итеп бикләү

**ЗАЩЁЛКНУТЬСЯ** *сов.* шалт (сылт, шылт) итеп бикләнеү (ябылыу); **замо́к защёлкнулся** йоҙаҡ шылт итеп бикләнде

**ЗАЩЕМИ́ТЬ I** *сов. что* ҡыҫтырыу, ҡыҫтырып ҡуйыу, эләктереү; **защеми́ть па́лец** бармаҡты ҡыҫтырыу

**ЗАЩЕМИ́ТЬ II** *сов. безл.* (*начать щемить*) сәнсә (ҡыҫа, әрней) башлау, сәнсеп (ҡыҫып, әрнеп, ауыртып) китеү; **защеми́ло грудь** күкрәк ҡыҫа башланы

**ЗАЩЕМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **защеми́ть** I

**ЗАЩИПА́ТЬ** *сов. кого*; *разг.* **1.** семтекләү, семеткеләп интектереү **2.** бөгөп тоташтырыу, бөгөп сығыу; **защипа́ть пиро́г** бәлеш ситтәрен бөгөү

**ЗАЩИПНУ́ТЬ** *сов. что, чего* ҡыҫтырып (эләктереп) алыу, (ҡыҫҡыс менән) семтеп алыу

**ЗАЩИ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **защипну́ть**

**ЗАЩИ́ТА** *ж* **1.** *см.* **защити́ть — защища́ть, защити́ться — защища́ться**; **защи́та ми́ра** тыныслыҡ һаҡлау **2.** һаҡланыу, һаҡлаусы, һаҡлағыс; **противота́нковая защи́та** танкылар һөжүменән һаҡланыу **3.** *собир.*; *юр.* яҡлаусы(лар), яҡлаусы яҡ; **выступле́ние защи́ты** яҡлаусы яҡтың сығышы **4.** *спорт.* һаҡсылар, һаҡ; **защи́та у кома́нды надёжная** команданың һаҡсылары ышаныслы

**ЗАЩИТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яҡлау ...ы; **защити́тельная речь** яҡлау телмәре

**ЗАЩИТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һаҡлау, ҡурғау, ҡурсалау, яҡлау; **защити́ть ребёнка** баланы ҡурсалау; **защити́ть от врага́** дошмандан һаҡлау **2.** *что* яҡлау, яҡлап ҡалыу; **защити́ть свою́ то́чку зре́ния** үҙ ҡарашыңды яҡлау **3.** *кого-что* ышыҡлау, ҡаплау; **защити́ть глаза́ от со́лнца** күҙҙе ҡояштан ышыҡлау **4.** *что* яҡлау; **защити́ть диссерта́цию** диссертация яҡлау

**ЗАЩИТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һаҡланыу, ҡаршы тороу; **защити́ться от неприя́теля** дошмандан һаҡланыу; **защити́ться от хо́лода** һыуыҡтан һаҡланыу **2.** *разг.* яҡлау (*диссертация, диплом эшен һ.б.*)

**ЗАЩИ́ТНИК** *м* **1.** яҡлаусы, һаҡлаусы, ҡурғаусы; **защи́тники Ро́дины** Ватанды һаҡлаусылар **2.** *юр.* яҡлаусы **3.** *спорт.* һаҡсы

**ЗАЩИ́ТНИЦА** *ж см.* **защи́тник** 1

**ЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаҡлау ...ы, һаҡлағыс, һаҡлай (ышыҡлай) торған; **защи́тные**

**лесны́е по́лосы** һаҡлағыс урман һыҙаттары; **защи́тные очки́** һаҡлағыс күҙлек; **защи́тное приспособле́ние** һаҡлау ҡулайламаһы **2.** *разг.* (*о цвете*) һорғолт йәшел (*тәбиғәт төҫөнә яҡын*); **защи́тный костю́м** һорғолт йәшел костюм

**ЗАЩИЩА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **защити́ть**; **защища́ть Оте́чество** Тыуған илде һаҡлау **2.** *кого-что*; *юр.* яҡлау, яҡларға алыу; **защища́ть подсуди́мого** хөкөм ителеүсене яҡларға алыу

**ЗАЩИЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **защити́ться** **2.** *страд. от* **защища́ть**

**ЗАЯВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ЗАЯВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж*; *спец.* белдереүсе, ғариза биреүсе

**ЗАЯВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, о чём* белдереү, хәбәр итеү; **заяви́ть о своём согла́сии** үҙеңдең ризалығыңды белдереү **2.** *что, о ком-чём* танытыу, күрһәтеү; **жела́ние заяви́ть о себе́** үҙен танытыу теләге

**ЗАЯВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* килеп инеү, килеп сығыу, ҡайтып инеү; **он заяви́лся но́чью** ул төндә килеп инде

**ЗАЯ́ВКА** *ж* заявка, ғариза; **сде́лать зая́вку** заявка биреү; **зая́вка на биле́т** билетҡа заявка

**ЗАЯВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** белдереү; **заявле́ние прави́тельства** хөкүмәт белдереүе; **сде́лать заявле́ние** белдереү яһау **2.** (*письменное*) ғариза; **пода́ть заявле́ние** ғариза биреү; **заявле́ние об о́тпуске** ял хаҡында ғариза

**ЗАЯВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **заяви́ть**

**ЗАЯВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **заяви́ться**

**ЗАЯ́ДЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* сәмле, ҡомарлы, хирес; **зая́длый игро́к** сәмле уйынсы; **зая́длый охо́тник** ҡомарлы һунарсы

**ЗА́ЯЦ** *м* **1.** ҡуян; **за́яц-беля́к** аҡ ҡуян; **за́яц-руса́к** үр ҡуяны, үрғуян; **охо́та на за́йцев** ҡуян һунары **2.** *разг.* билетһыҙ пассажир; **е́хать за́йцем** билетһыҙ йөрөү (*транспортта*) ♦ **уби́ть двух за́йцев** ике ҡуянды бер юлы атыу, ике кәмә ҡойроғон тотоу; **гоня́ться (гна́ться, погна́ться) за двумя́ за́йцами** ике ҡуян артынан ҡыуыу (*бер юлы ике эште башҡарырға тырышыу*)

**ЗА́ЯЧИЙ,** -ья, -ье ҡуян …ы; **за́ячий мех** ҡуян тиреһе; **за́ячий след** ҡуян эҙе ♦ **за́ячья губа́** китек ирен; **за́ячья душа́** ҡуян йөрәк (*утә ҡурҡаҡ*); **за́ячья капу́ста** *бот.* ҡуян кәбеҫтәһе

**ЗВА́НИЕ** *с* **1.** *офиц.* исем; **учёное зва́ние** ғилми исем; **присвое́ние зва́ния** исем биреү; **зва́ние заслу́женного де́ятеля нау́ки** атҡаҙанған фән эшмәкәре исеме **2.** звание, дәрәжә; **зва́ние капита́на** капитан дәрәжәһе **3.** *уст.* чин, титул, ҡатлам; **гра́фское зва́ние** граф титулы; **лю́ди ра́зного зва́ния** төрлө ҡатлам кешеләре ♦ **одно́ (то́лько) зва́нье** *прост.* исеме генә, есеме юҡ; **одно́ зва́ние оста́лось** исеме генә ҡалды

**ЗВА́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** саҡырылған; **зва́ные го́сти** саҡырылған ҡунаҡтар **2.** саҡырыулы; **зва́ный обе́д** саҡырыулы аш мәжлесе

**ЗВА́ТЕЛЬНЫЙ: зва́тельный паде́ж** *грам.* өндәшеү килеше, өндәш килеш; **зва́тельная фо́рма** өндәшеү формаһы (*ҡайһы бер телдәрҙә кешегә өндәшеүҙе белдергән форма*)

**ЗВАТЬ** *несов. кого-что* **1.** саҡырыу; **звать в теа́тр** театрға саҡырыу; **звать на по́мощь** ярҙамға саҡырыу; **зва́ть в го́сти** ҡунаҡҡа саҡырыу **2.** *кем, как* атау, исемләү, өндәшеү, тип өндәшеү; **звать отцо́м** атай тип өндәшеү; **как вас зову́т?** исемегеҙ нисек?, исемең кем?; **зва́ли его́ Ахме́том** уны Әхмәт тип йөрөтәләр ине ♦ **помина́й как зва́ли** эҙе лә ҡалманы, елдәр иҫте

**ЗВА́ТЬСЯ** *несов.* аталыу, исемләнеү; **на́ша респу́блика зовётся Башкортоста́ном** беҙҙең республика Башҡортостан тип атала

**ЗВЕЗДА́** *ж*; *в разн. знач.* йондоҙ; **Поля́рная звезда́** Тимерғаҙыҡ йондоҙо; **вече́рняя звезда́** эңер йондоҙо; **у́тренняя звезда́** таң йондоҙо; **пятиконе́чная звезда́** биш ҡырлы йондоҙ; **нарисова́ть звезду́** йондоҙ төшөрөү; **ма́ршальская звезда́** маршал йондоҙо; **звезда́ сча́стья** бәхет йондоҙо: **ло́шадь с бе́лой звездо́й на лбу** йондоҙ ҡашҡа ат; **звезда́ теа́тра** театр йондоҙо ♦ **восходя́щая звезда́** даны күтәрелә барған шәхес; **морска́я звезда́** *зоол.* диңгеҙ йондоҙо; **звезда́ пе́рвой величины́**: 1) күҙгә ташланып торған иң яҡты йондоҙ; 2) эше, таланты менән данлы кеше; **звёзд с не́ба не хвата́ть** аҡылы, һәләте менән ғәҙәти кеше булыу; **роди́ться под счастли́вой звездо́й** бөркәнсектә тыуыу (*бәхетле булыу, бәхете үҙе менән бергә булыу*); **счита́ть звёзды** йондоҙ һанау

**ЗВЕЗДАНУ́ТЬ** *сов. кого, кому*; *прост.* тондороу, сәпәү

**ЗВЁЗДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йондоҙҙар …ы; **звёздная систе́ма** йондоҙҙар системаһы **2.** йондоҙло; **звёздное не́бо** йондоҙло күк ♦ **звёздная боле́знь** бөйөклөк ауырыуы (*үтә һауалы кешегә ҡарата*); **звёздный год** *астр.* йондоҙ йылы; **звёздный дождь** йондоҙ ямғыры (*метеорҙарҙың күпләп төшөүе*); **звёздный час** *чей* йондоҙо балҡыған мәл (*кешенең эше уңған, һәләте иң юғары булған мәле*)

**ЗВЕЗДОЛЁТ** *м* йыһан осҡосо

**ЗВЕЗДОЛЁТЧИК** *м* йондоҙға осоусы

**ЗВЕЗДОЧЁТ** *м* **1.** *уст.* фалсы, йондоҙнамәсе (*йондоҙҙарға ҡарап фал асыусы*) **2.** йыртҡыс диңгеҙ балығы (*күҙҙәре өҫкә ҡараған*)

**ЗВЁЗДОЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **звезда́** **2.** *в разн. знач.* йондоҙсоҡ; **поста́вить звёздочку** йондоҙсоҡ ҡуйыу **3.** *спец.* (*шестерня*) тешле сығыр

**ЗВЕ́ЗДЧАТЫЙ** и **ЗВЕЗДЧА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** йондоҙ һымаҡ, йондоҙға оҡшаш; **зве́здчатые цветы́** йондоҙға оҡшаш сәскәләр; **зве́здчатый руби́н** йондоҙ һымаҡ ҡыҙыл яҡут **2.** *перен.* (*сверкающий*) ялтыр, йымылдаҡ; **зве́здчатый снег** йымылдаҡ ҡар

**ЗВЕНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** шалтырау, шылтырау, зыңлау, сылтырау, сыңлау; **звени́т колоко́льчик** ҡыңғырау шылтырай; **стёкла звеня́т** быяла сылтырай **2.** *чем* сылтыратыу, шылтыратыу, зыңлатыу; **звене́ть моне́тами** аҡсалар сылтыратыу ♦ **в уша́х (в у́хе, в голове́) звени́т** ҡолаҡ сыңлай (шаулай)

**ЗВЕНО́** *с* **1.** быуын, дүңгәләк; **звено́ цепи́** сынйыр быуыны **2.** *перен.* (*составная часть целого*) быуын, бүлек, өлөш; **основно́е звено́ произво́дства** етештереүҙең төп бүлеге **3.** (*о заборе*) тороҡ; (*об окне*) өлгө; (*о деревянном срубе*) рәт, ниргә **4.** (*единица какого-л. объединения*) звено; **полево́дческое звено́** баҫыусылыҡ звеноһы; **звено́ самолётов** самолёттар звеноһы

**ЗВЕНЬЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** звено(лар) ...ы; **звеньево́й ме́тод** звенолар ысулы **2.** *в знач. сущ.* **звеньево́й** *м* и **звеньева́я** *ж* звено башлығы; **звеньевы́е брига́ды** бригаданың звено башлыҡтары

**ЗВЕРЁК** *м* бәләкәй кейек (йәнлек)

**ЗВЕРЁНОК** и **ЗВЕРЁНЫШ** *м*; *разг.* кейек (йәнлек) балаһы, бала кейек

**ЗВЕРЕ́ТЬ** *несов.* йыртҡысланыу, ҡotoроу, ҡанһыҙланыу

**ЗВЕРИ́НЕЦ** *м*; *уст.*, *разг.* зверинец (*ҡырағай йәнлектәрҙе күрһәтеү өсөн тамаша урыны*)

**ЗВЕРИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәнлек ...ы, йыртҡыс ...ы; **звери́ные следы́** йәнлек эҙҙәре; **звери́ная шку́ра** йәнлек тиреһе **2.** *перен.* йыртҡыстарса, ҡаты, рәхимһеҙ; **звери́ная не́нависть** йыртҡыстарса нәфрәт; **звери́ные зако́ны** рәхимһеҙ ҡанундар **3.** *разг.* үтә көслө, бик ныҡ; **звери́ная тоска́** үтә көслө һағыш ♦ **звери́ный стиль (орна́мент)** йәнлек һынлы стиль (*боронғо һынлы сәнғәттә хайуандар һүрәтен ҡулланған стиль*)

**ЗВЕРОБО́Й I** *м* һунарсы, аусы (*диңгеҙ йәнлектәренә*)

**ЗВЕРОБО́Й II** *м* **1.** *бот.* һары мәтрүшкә (*дарыу үләне*) **2.** зверобой (*араҡы төрө*)

**ЗВЕРОБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое һунарсылыҡ (аусылыҡ) ...ы; **зверобо́йный про́мысел** һунарсылыҡ кәсебе

**ЗВЕРОВО́Д** *м* йәнлек аҫрау белгесе, кейексе

**ЗВЕРОВО́ДСТВО** *с* йәнлекселек, йәнлек аҫрау (үрсетеү); **занима́ться зверово́дством** йәнлекселек менән шөғөлләнеү

**ЗВЕРОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое йәнлек үрсетеү ...ы, йәнлекселек ...ы; **зверово́дческий совхо́з** йәнлекселек совхозы

**ЗВЕРОВО́Й,** -ая, -ое йәнлек (кейек) ...ы; **зверова́я тропа́** кейек һуҡмағы; **зверова́я соба́ка** кейек эте

**ЗВЕРОВЩИ́К** *м* кейексе, һунарсы

**ЗВЕРОЛО́В** *м* кейек тотоусы, кейексе, йәнлек аулаусы, аусы

**ЗВЕРОЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое кейек (йәнлек) аулау ...ы; **зверол́овный про́мысел** кейек аулау кәсебе; **зверол́овные сна́сти** кейек аулау ҡоралдары

**ЗВЕРОЛО́ВСТВО** *с* кейек (йәнлек) аулау кәсебе, һунарсылыҡ, аусылыҡ

**ЗВЕРОПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое кейек (йәнлек) һымаҡ, йыртҡысҡа оҡшаған

**ЗВЕРОСОВХО́З** *м* (*звероводческий совхоз*) йәнлекселек совхозы

**ЗВЕРОФЕ́РМА** *ж* (*звероводческая ферма*) йәнлек фермаһы

**ЗВЕ́РСКИ** *нареч.* аяуһыҙ, йыртҡыстарса; **зве́рски пыта́ть** йыртҡыстарса язалау

**ЗВЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое **1.** аяуһыҙ, йыртҡыстарса; **зве́рский посту́пок** йыртҡыстарса ҡылыҡ **2.** *разг.* бик көслө (ныҡ); **зве́рский аппети́т** бик ныҡ ашағы килеү

**ЗВЕ́РСТВО** *с* йыртҡыслыҡ, аяуһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ, рәхимһеҙлек, вәхшилек; **прояви́ть зве́рство** аяуһыҙлыҡ күрһәтеү

**ЗВЕ́РСТВОВАТЬ** *несов.* йыртҡысланыу, аяуһыҙланыу, ҡанһыҙланыу, йыртҡыстарса эш итеү, аяуһыҙлыҡ күрһәтеү

**ЗВЕРЬ** *м* **1.** (*о хищнике*) йыртҡыс, йыртҡыс хайуан; (*о диком животном*) (ҡырағай) йәнлек, кейек, януар; **пушны́е зве́ри** ҡиммәтле тиреле йәнлектәр (кейектәр) **2.** ҡаты бәғерле (ҡанһыҙ, аяуһыҙ, ҡырағай, йыртҡыс) кеше ♦ **стре́ляный зверь** күпте күргән, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған, ҡарт төлкө; **смотре́ть зве́рем** уҫал ҡарау; **буди́ть зве́ря** *в ком-л. кемдең дә булһа* асыуын ҡабартыу (килтереү), ҡырағай тойғоларҙы уятыу

**ЗВЕРЬЁ** *с собир.*; *разг.* йәнлектәр, йыртҡыс хайуандар

**ЗВЕРЮ́ГА** *м* и *ж*; *разг. см.* **зверь**

**ЗВОН** *м* сың, шалтырау, шылтырау, сыңғырау, зыңлау; **звон бока́лов** бокалдар сыңы; **звон колоколо́в** ҡыңғырауҙар сыңы; **погреба́льный звон** матәм сыңы ♦ **мали́новый звон** *см.* **мали́новый**

**ЗВОНА́РЬ** *м* саң ҡағыусы, ҡыңғыраусы (*сиркәү хеҙмәткәре*)

**ЗВОНИ́ТЬ** *несов.* **1.** саң ҡағыу, шалтыратыу, сыңғыратыу; **звони́ть в ко́локол** саң ҡағыу **2.** шылтырау; **телефо́н звони́т** телефон шылтырай **3.** *кому* шылтыратыу; **я звони́л бра́ту** мин ағайыма шылтыраттым ♦ **звони́ть во все колокола́** *прост.* бөтә донъяға (тарафҡа) оран һалыу (таратыу)

**ЗВО́НКИЙ,** -ая, -ое яңғырауыҡлы, зыңлап (шыңғырап) торған, сағыу; **зво́нкий го́лос** сағыу тауыш; **зво́нкая пе́сня** яңғырауыҡлы йыр ♦ **зво́нкая моне́та** тимер аҡса; **зво́нкая фра́за** буш (ҡабарынҡы) һүҙ; **зво́нкий согла́сный** *лингв.* яңғырау тартынҡы

**ЗВОНКОГОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое яңғырау (сағыу) тауышлы; **звонкоголо́сые де́ти** сағыу тауышлы балалар

**ЗВО́НКОСТЬ** *ж* яңғырауыҡлыҡ, сағыулыҡ; **зво́нкость го́лоса** тауыш сағыулығы

**ЗВО́ННИЦА** *ж* саң манараһы; **зво́нница ста́рой це́ркви** иҫке сиркәүҙең саң манараһы

**ЗВОНО́К** *м* **1.** ҡыңғырау; **электри́ческий звоно́к** электр ҡыңғырауы; **дверно́й звоно́к** ишек ҡыңғырауы **2.** шалтырау, зыңғырлау, ҡыңғырау (тауышы); **разда́лся звоно́к** ҡыңғырау тауышы ишетелде, ҡыңғырау шалтыраны **3.** *разг.* (*телефонный разговор*) шылтыратыу; **звоно́к из министе́рства** министрлыҡтан шылтыратыу

**ЗВУК** *м* **1.** *в разн. знач.* тауыш; **ско́рость зву́ка** тауыш тиҙлеге; **музыка́льный звук** музыкаль тауыш; **издава́ть звук** тауыш сығарыу **2.** *лингв.* өн; **гла́сные зву́ки** һуҙынҡы өндәр; **согла́сные зву́ки** тартынҡы өндәр; **зву́ки и бу́квы** өндәр һәм хәрефтәр ♦ **ни зву́ка** тып-тын, шыпшым, өн сығармау; **пусто́й звук** буш (мәғәнәһеҙ) һүҙ

**ЗВУКО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "тауыш", "өн" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **звукоизмере́ние** тауыш үлсәү; **звуконепроница́емый** тауыш үткәрмәй торған

**ЗВУКОВО́Й,** -ая, -ое **1.** *физ.* тауыш ...ы; **звукова́я волна́** тауыш тулҡыны; **звуковы́е колеба́ния** тауыш тирбәлештәре **2.** тауышлы; **звуково́е кино́** тауышлы кино **3.** *лингв.* өн ...ы; **звуковы́е зако́ны** өндәр законы (ҡануны)

**ЗВУКОЗАПИ́СЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее тауыш яҙыу ...ы, тауыш яҙа торған; **звукозапи́сывающий аппара́т** тауыш яҙыу аппараты

**ЗВУКОЗА́ПИСЬ** *ж* тауышты яҙыу

**ЗВУКОИЗОЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое тауыш үткәрмәүсән; **звукоизоляцио́нные материа́лы** тауыш үткәрмәүсән материалдар

**ЗВУКОИЗОЛЯ́ЦИЯ** *ж* тауыш үткәрмәү ҡорамалдары

**ЗВУКООПЕРА́ТОР** *м* тауыш операторы

**ЗВУКОПОДРАЖА́НИЕ** *с* **1.** (*воспроизведение звуков*) тауышҡа оҡшатыу, тауыш эйәртеме; **спосо́бность к звукоподража́нию** тауышҡа оҡшатыу һәләте **2.** *лингв.* өн оҡшатыу

**ЗВУКОПОДРАЖА́ТЕЛЬ** *м* тауышҡа оҡшатыусы

**ЗВУКОПОДРАЖА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өноҡшаш; **звукоподража́тельные слова́** өноҡшаш һүҙҙәр

**ЗВУКОПРОВО́ДНОСТЬ** *ж* тауыш үткәреүсәнлек, тауыш үткәрә торған булыуы; **звукопрово́дность воды́** һыуҙың тауыш үткәреүсәнлеге

**ЗВУКОПРОВОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее тауыш үткәреүсән, тауыш үткәрә торған; **звукопроводя́щая среда́** тауыш үткәреүсән мөхит

**ЗВУКОПРОНИЦА́ЕМОСТЬ** *ж* тауыш үткәреүсәнлек; **звукопроница́емость во́здуха** һауаның тауыш үткәреүсәнлеге

**ЗВУКОПРОНИЦА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое тауыш үтеүсән (үткәреүсән, үтә торған); **звукопроница́емая стена́** тауыш үтеүсән стена

**ЗВУКОРЯ́Д** *м*; *муз.* (музыкаль) тауыштар рәте; **гармони́ческий звукоря́д** гармоник музыкаль тауыштар рәте

**ЗВУКОСОЧЕТА́НИЕ** *с* тауыш (өн) бәйләнеше; **мелоди́ческое звукосочета́ние** мелодик тауыштар бәйләнеше

**ЗВУКОУЛА́ВЛИВАТЕЛЬ** *м* тауыш тотҡос (*самолёт, һыу аҫты кәмәһе һ.б. тауышын тота торған*)

**ЗВУКОУСИЛИ́ТЕЛЬ** *м* тауыш көсәйткес

**ЗВУЧА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **звуча́ть** 1, 2; **2.** (*звуки*) яңғыраш, сың; **звуча́ние струн** ҡылдар сыңы **3.** *перен.* йүнәлеш, мәғәнә; **социа́льное звуча́ние пье́сы** пьесаның социаль йүнәлеше

**ЗВУЧА́ТЬ** *несов.* **1.** яңғырау, яңғырап тороу, ишетелеү; **звуча́т голоса́** тауыштар яңғырап тора **2.** *чем* и *без доп.* яңғырап тороу; **степь звучи́т пе́нием птиц** дала ҡоштар йыры менән яңғырап тора **3.** *перен.* тойолоу, беленеп (һиҙелеп) тороу; **в его́ го́лосе звучи́т си́ла** уның тауышында көс һиҙелеп тора ♦ **звуча́ть в се́рдце (в па́мяти)** йөрәктә (иҫтә, хәтерҙә) ныҡ һаҡланыу

**ЗВУЧА́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **звуча́ть** **2.** *прил.* яңғырашлы, яңғырауыҡ, яңғырап торған; **звуча́щая речь** яңғырап торған телмәр

**ЗВУ́ЧНОСТЬ** *ж* яңғырашлы, көслө (асыҡ) тауышлы булыу; **зву́чность орке́стра** оркестрҙың яңғырашлы булыуы

**ЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое яңғырашлы, яңғырауыҡлы, көслө (сағыу, асыҡ) тауышлы; **зву́чный го́лос** яңғырауыҡлы тауыш; **зву́чный колоко́льчик** сағыу тауышлы ҡыңғырау

**ЗВЯ́КАНЬЕ** *с* зың, сың, сылтырау; **звя́канье шпор** шпорҙар сыңы

**ЗВЯ́КАТЬ** *несов. см.* **звя́кнуть** 1

**ЗВЯ́КНУТЬ** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* сылтыр (шылтыр) итеү (иттереү), сылтырап (шылтырап) ҡуйыу; **стекло́ звя́кнуло** быяла сылтыр итте; **звя́кнуть колоко́льчиком** ҡыңғырауҙы шылтыр иттереү **2.** *прост.* шылтыратыу (*телефондан*); **звя́кнуть дру́гу** дуҫҡа шылтыратып алыу

**ЗГИ: (ни) зги́ не ви́дно** дөм-ҡараңғы, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғы

**ЗДА́НИЕ** *с* бина, йорт; **высо́тное зда́ние** бейек бина; **зда́ние ци́рка** цирк бинаһы

**ЗДЕСЬ** *нареч.* **1.** (*в этом месте*) бында, ошонда; **я живу́ здесь** мин бында йәшәйем **2.** (*в этот момент*) шунда, шул саҡта; **здесь он ка́шлянул** шул саҡта ул йүткереп ебәрҙе

**3.** (*в этом случае*) бында, был осраҡта; **здесь я не могу́ помо́чь** был осраҡта мин ярҙам итә алмайым

**ЗДЕ́ШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* бындағы, был урындағы, ошондағы; **зде́шние лю́ди** бындағы кешеләр; **зде́шние усло́вия** бындағы шарттар

**ЗДОРО́ВАТЬСЯ** *несов.* иҫәнләшеү, күрешеү; **здоро́ваться за́ руку** ҡул бирешеп иҫәнләшеү

**ЗДОРОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *прост.* **1.** (*о человеке*) таҙа, ҙур кәүҙәле, әзмәүерҙәй; **здорове́нный па́рень** әзмәүерҙәй егет **2.** (*о предмете*) бик ҙур, дәү, елле; **здорове́нная дуби́на** бик ҙур күҫәк

**ЗДОРОВЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* таҙара төшөү, күрәйә (ҡалыная) биреү

**ЗДОРО́ВИТЬСЯ** *несов. безл.*; *разг.* (*только в вопр. и отриц. оборотах*) *см.* **нездоро́виться**

**ЗДО́РОВО** *нареч.*; *прост.* **1.** (*очень сильно*) бик ҡаты, бик ныҡ; **я здо́рово проголода́лся** мин бик ныҡ асыҡтым **2.** (*отлично, искусно*) бик оҫта, бик шәп (яҡшы); **здо́рово сде́лано** бик оҫта эшләнгән

**ЗДОРО́ВО** *межд.*; *прост.* (*приветствие*) һаумы, нихәл, арыумы, шәпме; **здоро́во, дружи́ще** нихәл, дуҫҡай ♦ **здоро́во живёшь (живёте)!** һаумыһығыҙ!, ни хәлдә йәшәйһегеҙ?; **(за) здоро́во живёшь** буштан-бушҡа, сәбәпһеҙгә

**ЗДОРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҫән, һау, иҫән-һау, сәләмәт; **здоро́вый ребёнок** сәләмәт бала; **здоро́вый вид** сәләмәт ҡиәфәт **2.** файҙалы; **здоро́вая пи́ща** файҙалы аҙыҡ **3.** *перен.* дөрөҫ, ғәҙел, айыҡ; **здоро́вая кри́тика** дөрөҫ тәнҡит; **здоро́вые мы́сли** айыҡ фекер **4.** *прост.* таҙа, көслө, мыҡты; **здоро́вый па́рень** мыҡты егет **5.** *прост.* ҡаты, көслө; **здоро́вый моро́з** ҡаты һыуыҡ ♦ **бу́дь(те) здоро́вы!** һау булығыҙ!, хушығыҙ!; **вали́ть (сва́ливать) с больно́й головы́ на здоро́вую** аҡ эт бәләһе ҡара эткә

**ЗДОРО́ВЬЕ** *с* һаулыҡ, сәләмәтлек, иҫәнлек, иҫәнлек-һаулыҡ; **бере́чь здоро́вье** һаулыҡты һаҡлау; **потеря́ть здоро́вье** һаулыҡты юғалтыу (ҡаҡшатыу); **как ва́ше здоро́вье?** сәләмәтлегегеҙ нисек? ♦ **за ва́ше здоро́вье** һеҙҙең һаулыҡҡа; **на (до́брое) здоро́вье** иҫәнлеккә-һаулыҡҡа

**ЗДОРОВЯ́К** *м*; *разг.* бик таҙа кеше, имәндәй ныҡ кеше

**ЗДРА́ВИЕ** *с*; *уст. см.* **здоро́вье** ♦ **во здра́вие** *уст.* иҫәнлеккә-һаулыҡҡа; **здра́вия жела́ю (жела́ем)** *воен.* һаулыҡ теләйем (теләйбеҙ); **нача́ть за здра́вие, а ко́нчить (свести́) за упоко́й** маҡтау менән башлап, яманлап ҡуйыу; күңелле башлап, күңелһеҙ бөтөрөү

**ЗДРА́ВИЦА** *ж* һаулыҡ тосы, һаулыҡҡа тост әйтеү (күтәреү); **провозгласи́ть здра́вицу в честь юбиля́ра** юбилярҙың һаулығына тост әйтеү

**ЗДРА́ВНИЦА** *ж* һаулыҡ йорто (*дауаланыу һәм ял итеү өсөн*); **здра́вницы Кры́ма** Ҡырымдың һаулыҡ йорттары

**ЗДРА́ВО** *нареч.* дөрөҫ, аҡыл менән; **здра́во рассужда́ть** дөрөҫ фекер йөрөтөү

**ЗДРАВО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "һаулыҡ", "таҙалыҡ", "айыҡ", "дөрөҫ" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **здравомы́слящий** айыҡ аҡыллы, дөрөҫ фекерле

**ЗДРАВООХРАНЕ́НИЕ** *с* һаулыҡ һаҡлау; **министе́рство здравоохране́ния** һаулыҡ һаҡлау министрлығы

**ЗДРАВООХРАНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һаулыҡ һаҡлау ...ы; **здравоохрани́тельные мероприя́тия** һаулыҡ һаҡлау саралары

**ЗДРА́ВСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** иҫән-һау булыу, һау-сәләмәт йәшәү; **он и ны́не здра́вствует** ул әле лә иҫән-һау **2.** *повел.* **здра́вствуй(те)**: 1) һаумы(һығыҙ); 2) *в знач. межд.*; *прост.* бына һиңә кәрәк булһа (*аптырау белдергәндә әйтелә*) ♦ **да здра́вствует!** *высок.* йәшәһен!

**ЗДРА́ВЫЙ,** -ая, -ое аҡыллы, төплө, дөрөҫ; **здра́вый ум** төплө аҡыл; **здра́вая поли́тика** төплө сәйәсәт ♦ **в здра́вом уме́** үҙ аҡылында, айыҡ фекерле

**ЗЕ́БРА** *ж* зебра (*ҡара-аҡ юлаҡлы ҡырағай ат*)

**ЗЕ́БУ** *м нескл.* зебу (*көмрө үгеҙ*)

**ЗЕВ** *м* **1.** йотҡолоҡ, тамаҡ; **по́лость зе́ва** тамаҡ ҡыуышлығы **2.** *уст.* ауыҙ; **зев льва** арыҫлан ауыҙы

**ЗЕВА́КА** *м* и *ж*; *разг.* аңшайған, асыҡ ауыҙ (*кеше*)

**ЗЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** иҫнәү; **зева́ть спросо́нья** уяныр-уянмаҫ иҫнәү **2.** *разг.* ауыҙ асып (аңшайып) ҡарап тороу; **зева́ть по сторона́м** тирә-яҡҡа ауыҙ асып ҡарап тороу **3.** *разг.* ауыҙ асып (күрмәй) ҡалыу

**ЗЕВНУ́ТЬ** *сов.* **1.** иҫнәп ҡуйыу **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* күрмәй ҡалыу, күрмәй отолоп ҡуйыу (*уйында*); **зевну́ть ферзя́** ферзде күрмәй ҡалыу

**ЗЕВО́К** *м* иҫнәү, иһәнәү; **глубо́кий зево́к** тәрән иҫнәү

**ЗЕВО́ТА** *ж* иҫнәү, иҫнәге килеү; **напа́ла зево́та** иҫнәге килә башланы

**ЗЕЛЕНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** йәшелләнеү, йәшәреү, йәшелгә әйләнеү; **поля́ зелене́ют** яландар йәшелләнә **2.** (*виднеться — о чём-л. зелёном*) йәшәреү, йәшел булып күренеү, йәшелләнеп тороу; **вдали́ зелене́ет лес** алыҫта урман йәшәреп күренә **3.** *разг.* йәшелләнеү, күгәреү; **бро́нза зелене́ет** бронза йәшелләнә (*тутығып*) ♦ **в глаза́х зелене́ет** күҙ алдары ҡараңғылана (*арыуҙан*)

**ЗЕЛЕНЕ́Ц** *м*; *с.-х.* йәшел иген (*йәшел көйө йыйылған*)

**ЗЕЛЕНИ́ТЬ** *несов. что* йәшелләндереү, йәшелләү, йәшелгә буяу

**ЗЕЛЁНКА** *ж*; *разг.* зелёнка, йәшел һыу (*дарыу*)

**ЗЕЛЕНЩИ́К** *м* йәшелсә һатыусы

**ЗЕЛЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәшел; **зелёная трава́** йәшел үлән; **зелёная ткань** йәшел туҡыма **2.** йәш, йәшел; **зелёный корм** йәшел аҙыҡ (*яңы сабылған үлән*) **3.** бешмәгән, өлгөрмәгән, йәшел; **зелёные я́блоки** бешмәгән алмалар **4.** *перен.* йәш, тәжрибәһеҙ; **зелёный юне́ц** йәш үҫмер ♦ **до зелёного змия́ (допи́ться)** лаяҡыл эсеү, ләх булғансы эсеү; **зелёная тоска́** һары һағыш; **зелёная у́лица**: 1) барлыҡ семафорҙар йәшел, юл асыҡ; 2) ҡаршылыҡ юҡ, юл асыҡ (*эштә, тормошта*); **зелёный конве́йер** йәшел конвейер (*көтөү ваҡытында малға йәшел аҙыҡты туҡтауһыҙ әҙерләү системаһы*); **зелёный горо́шек** йәшел борсаҡ (*консерваланған йәш борсаҡ*); **зелёный чай** йәшел (күк) сәй

**ЗЕ́ЛЕНЬ** *ж* **1.** *собир.* йәшеллек, йәшел үҫемлек; **утопа́ть в зе́лени** йәшеллеккә күмелеү **2.** *собир.* йәшелсә (*салат, ҡуҙғалаҡ һ.б.*); **прода́жа све́жей зе́лени** яңы йәшелсә һатыу; **торгова́ть зе́ленью** йәшелсә менән сауҙа итеү **3.** йәшел төҫ; **мо́ре отлива́ло зе́ленью** диңгеҙ йәшел төҫ алды **4.** йәшел буяу; **ци́нковая зе́лень** цинклы йәшел буяу **5.** *разг.* күк; **хлеб покры́лся зе́ленью** икмәкте күк ҡаплаған (күгәргән)

**ЗЕЛЕНЯ́** *только мн.* йәшел ужым

**ЗЕ́ЛЬЕ** *с* **1.** *уст.* үлән төнәтмәһе (*дарыу йәки ағыу итеп ҡулланылған*) **2.** *прост., уст.* (*о водке, вине, кофе, табаке и т.п.*) эсемлек

**ЗЕМЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ер ...ы; **земе́льная рефо́рма** ер реформаһы; **земе́льный уча́сток** ер участкаһы; **земе́льное законода́тельство** ер хаҡында закон (ҡанун)

**ЗЕМЛЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ер" тигән мәғәнәләге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **землеве́д** ер белгесе; **землеустро́йство** ер төҙөлөшө

**ЗЕМЛЕВЕ́ДЕНИЕ** *с* ер белеме (*ерҙең дөйөм физик-географик законлыҡтарын өйрәнә торған фән; дөйөм физик география*)

**ЗЕМЛЕВЛАДЕ́ЛЕЦ** *м* ер биләүсе, ер хужаһы; **кру́пный землевладе́лец** эре ер биләүсе

**ЗЕМЛЕВЛАДЕ́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ер биләүҙән килгән, ер биләү ..ы; **землевладе́льческие дохо́ды** ер биләү килемдәре

**ЗЕМЛЕВЛАДЕ́НИЕ** *с* **1.** ер биләү, ер биләүселек (*билдәле бер шарттарҙа ер тотоу*) **2.** *офиц.-дел.* ер биләмәһе

**ЗЕМЛЕДЕ́ЛЕЦ** *м* игенсе, ер эшкәртеүсе

**ЗЕМЛЕДЕ́ЛИЕ** *с* игенселек; **ороша́емое земледе́лие** һуғарыулы игенселек; **занима́ться земледе́лием** игенселек менән шөғөлләнеү; **культу́ра земледе́лия** игенселек культураһы

**ЗЕМЛЕДЕ́ЛЬЧЕСКИЙ,** -ая, -ое игенселек ...ы; **земледе́льческий райо́н** игенселек районы; **земледе́льческие маши́ны** игенселек машиналары

**ЗЕМЛЕКО́П** *м* ер ҡаҙыусы (*эшсе*)

**ЗЕМЛЕМЕ́Р** *м*; *уст.* ер үлсәүсе (*белгес*)

**ЗЕМЛЕМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое ер үлсәү ...ы; **землеме́рные рабо́ты** ер үлсәү эштәре

**ЗЕМЛЕПА́ШЕСТВО** *с см.* **земледе́лие**

**ЗЕМЛЕПА́ШЕЦ** *м см.* **земледе́лец**

**ЗЕМЛЕПО́ЛЬЗОВАНИЕ** *с* ер файҙаланыу, ер файҙаланыу тәртибе; **рефо́рма землепо́льзования** ер файҙаланыу реформаһы

**ЗЕМЛЕПРОХО́ДЕЦ** *м* ергиҙәр; **ру́сские землепрохо́дцы** урыҫ ергиҙәрҙәре

**ЗЕМЛЕРО́ЙКА** *ж* һуҡыр сысҡан

**ЗЕМЛЕРО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ер ҡаҙыу ...ы, ер ҡаҙғыс; **землеро́йная маши́на** ер ҡаҙыу машинаһы

**ЗЕМЛЕСО́С** *м* ер (ҡом) һурғыс (*һыу төбөнән йәки яр буйынан ҡом, балсыҡ һурҙырып, ситкә ҡыуҙыра торған машина*)

**ЗЕМЛЕСО́СНЫЙ,** -ая, -ое ер (ҡом) һурыу ...ы; **землесо́сная устано́вка** ер (ҡом) һурыу ҡоролмаһы

**ЗЕМЛЕТРЯСЕ́НИЕ** *с* ер тетрәү (һелкенеү); **си́льное землетрясе́ние** көслө ер тетрәү

**ЗЕМЛЕУСТРОИ́ТЕЛЬ** *м* ерҙе файҙаланыу буйынса белгес

**ЗЕМЛЕУСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ер төҙөлөшө ...ы, ерҙе файҙаланыу...ы, ер төҙөлөшө буйынса ерҙе файҙаланыу; **землеустрои́тельные рабо́ты** ер төҙөлөшө буйынса эш

**ЗЕМЛЕУСТРО́ЙСТВО** *с* ер төҙөлөшө (*ерҙән файҙаланыуҙы тәртипкә һалыу сараларының дәүләт системаһы*)

**ЗЕМЛЕЧЕРПА́ЛКА** *ж* ер (ҡом) ҡаҙғыс (*һыу аҫтын ҡаҙа торған машина*)

**ЗЕМЛЕЧЕРПА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ер (ҡом) ҡаҙыу ...ы; **землечерпа́тельные рабо́ты** ер ҡаҙыу эштәре

**ЗЕМЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** тупраҡлы, балсыҡлы; **земли́стый песо́к** тупраҡлы ҡом **2.** (*о цвете лица*) ер (көл) төҫлө, төҫө ҡасҡан, ҡобараһы осҡан; **земли́стое лицо́** ҡобараһы осҡан ҡиәфәт

**ЗЕМЛЯ́** *ж* **1.** (*планета*) Ер, Ер шары; **Земля́ враща́ется вокру́г Со́лнца** Ер Ҡояш тирәләй әйләнә **2.** (*место жизни*) ер, ер йөҙө, донъя **3.** (*суша*) ер, ҡоро ер; **земля́ и вода́** ер һәм һыу **4.** (*почва*) тупраҡ, ер, балсыҡ; **паха́ть зе́млю** ер һөрөү; **в не́драх земли́** ер ҡуйынында; **комо́к земли́** ер киҫәге **5.** (*территория, находящаяся в чьём-л. владении или пользовании, используемая в сельскохозяйственных целях*) ер, урын; **за́лежные зе́мли** ҡалдау ерҙәр; **национализа́ция земли́** ерҙе национализациялау; **прода́ть зе́мли** ер һатыу **6.** *высок.* (*страна*) ил, ер; **родна́я земля́** тыуған ил; **башки́рская земля́** башҡорт иле ♦ **земля́ обетова́нная** бәхет иле; **земля́ гори́т под нога́ми** *у кого* ҡайҙа баҫырға урын тапмай (*ауыр хәлгә ҡалыу хаҡында*); **за три́девять земе́ль** йәһәннәм төбөндә, ете ҡат ер аҫтында; **земли́ под**

**собо́й не слы́шать (не чу́ять)** ҡайҙа баҫҡанды белмәү, түбә күккә тейеү; **из-под земли́ доста́ть** нисек тә табыу; **(как, то́чно) сквозь зе́млю провали́лся** ер упҡандай юҡ булды; **гото́в (рад) сквозь зе́млю провали́ться** ер тишегенә инеп китерҙәй булыу; **сло́вно из (из-под) земли́ вы́расти** ҡапыл ҡалҡып сығыу, күктән төшкәндәй булыу; **преда́ть земле́** ерләү; **пуп земли́** *ирон.* донъя кендеге (тотҡаһы); **сровня́ть с землёй** ер менән тигеҙләү (емереп тар-мар итеү); **стере́ть с лица́ земли́** ер йөҙөнән юҡ итеү

**ЗЕМЛЯ́К** *м* и **ЗЕМЛЯ́ЧКА** *ж* яҡташ

**ЗЕМЛЯ́НЕ** *мн.* (*ед.* **земля́нин** *м*) Ер кешеләре, Ер шарында йәшәүселәр

**ЗЕМЛЯНИ́КА** *ж* ҡайын еләге (*цҫемлеге һәм емеше*)

**ЗЕМЛЯНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡайын еләге ...ы; **земляни́чное варе́нье** ҡайын еләге ҡайнатмаһы

**ЗЕМЛЯ́НКА** *ж* ер (баҙ) өй; **жить в земля́нке** ер өйҙә йәшәү

**ЗЕМЛЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** ер ҡаҙыу ...ы, ер ...ы; **земляны́е рабо́ты** ер ҡаҙыу эштәре **2.** (*сделанный из земли*) балсыҡ, тупраҡ, тупраҡтан яһалған; **земляна́я плоти́на** тупраҡ быуа; **земляно́е укрепле́ние** тупраҡ нығытма **3.** (*в ботанических и зоологических названиях*) ерҙә йәшәгән (үҫкән), ер ...ы; **земляно́й оре́х** ер сәтләүеге; **земляны́е че́рви** ер селәүсендәре

**ЗЕМЛЯ́ЧЕСТВО** *с* **1.** яҡташлыҡ, ерҙәшлек (*тыуған, йәшәгән урыны бер булған*) **2.** яҡташтар берекмәһе

**ЗЕМНОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ер-һыу ...ы **2.** *в знач. сущ.* **земново́дные** *мн.*; *зоол.* ер-һыу хайуандары

**ЗЕМНО́Й,** -ая, -ое **1.** ер ...ы; **земна́я пове́рхность** Ер өҫтө; **земно́й шар** Ер шары **2.** донъялағы, ер йөҙөндәге; **земны́е бла́га** ер йөҙөндәге рәхәтлектәр **3.** *перен.* ғәҙәти, үтә ябай; **земна́я поэ́зия** ғәҙәти шиғриәт ♦ **земно́й покло́н** бил бөгөп, ныҡ эйелеп сәләмләү, тәбрикләү

**ЗЕ́МСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *ист.* земский; **зе́мский собо́р** земство соборы **2.** земство ...ы; **зе́мский врач** земство табибы; **зе́мская шко́ла** земство мәктәбе

**ЗЕМСНАРЯ́Д** *м* земснаряд, ҡом һурғыс (*һыу аҫтындағы ҡомдо, балсыҡты һурып ҡыуҙыра торған махсус ҡоролмалы судно*)

**ЗЕ́МСТВО** *с*; *ист.* земство (*Октябрь революцияһына тиклем Рәсәйҙәге сикләнгән хоҡуҡлы урындағы цҙидара*)

**ЗЕНИ́Т** *м* **1.** *астр.* зенит, төшлөк (*күктең иң юғары нөктәһе*); **со́лнце в зени́те** ҡояш төшлөккә еткән **2.** *перен.* иң юғары нөктә, дәрәжә; **в зени́те сла́вы** дандың иң юғары нөктәһендә

**ЗЕНИ́ТКА** *ж*; *разг.* зенит тубы

**ЗЕНИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *астр.* зенит ...ы; **зени́тное расстоя́ние** зенит алыҫлығы **2.** *воен.* зенит ...ы; **зени́тная артилле́рия** зенит артиллерияһы

**ЗЕНИ́ТЧИК** *м* и **ЗЕНИ́ТЧИЦА** *ж* зенитсы (зенит тубынан атыусы) зенитсы

**ЗЕНИ́ЦА** *ж*; *уст.* күҙ, күҙ ҡараһы ♦ **бере́чь (храни́ть) как зени́цу о́ка** күҙ ҡараһы кеүек һаҡлау

**ЗЕ́РКАЛО** *с* **1.** көҙгө; **стенно́е зе́ркало** стена көҙгөһө **2.** *чего*; *перен.*йөҙ, өҫлөк, көҙгө; **зе́ркало о́зера** күлдең йөҙө **3.** *чего*, *какое*; *перен.* йөҙ, көҙгө ...ы; **зе́ркало души́** күңел көҙгөһө

**ЗЕРКА́ЛЬНОСТЬ** *ж* шымалыҡ, йылтырлыҡ; **зерка́льность пове́рхности** йөҙөнөң (өҫтөнөң) йылтырлығы

**ЗЕРКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** көҙгө ...ы; **зерка́льная мастерска́я** көҙгө оҫтаханаһы **2.** көҙгөлө; **зерка́льный шкаф** көҙгөлө шкаф **3.** *перен.* шып-шыма, көҙгө кеүек, ялтырап торған; **зерка́льный парке́т** көҙгө кеүек паркет ♦ **зерка́льный карп** *зоол.* тәңкәһеҙ һаҙан; **зерка́льное стекло́** шымартылған ҡалын быяла (*көҙгө яһау өсөн ҡулланыла*)

**ЗЕРКА́ЛЬЩИК** *м* көҙгө яһаусы, көҙгө оҫтаһы

**ЗЕРНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое бөртөклө, ярмалы; **зерни́стый известня́к** бөртөклө эзбизташ; **зерни́стый снег** ярмалы ҡар

**ЗЕРНО́** *с* **1.** (*семя злаков*) ашлыҡ бөртөгө, орлоҡ; **ячме́нное зерно́** арпа орлоғо **2.** *собир.* ашлыҡ, иген; **семенно́е зерно́** орлоҡ игене; **произво́дство зерна́** иген етештереү **3.** бөртөк; **жемчу́жное зерно́** ынйы бөртөгө **4.** *перен.* (*ядро чего-л.*) асыл, орлоҡ, бөртөк; **зерно́ и́стины** хаҡлыҡ орлоғо

**ЗЕРНОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое бөртөк һымаҡ, орлоҡҡа оҡшаған; **зернови́дные кле́тки** орлоҡҡа оҡшаған күҙәнәктәр

**ЗЕРНОВО́Й,** -ая, -ое **1.** бөртөклө ашлыҡ ...ы, игенселек ...ы, бөртөклө; **зерново́е хозя́йство** игенселек хужалығы **2.** *в знач. сущ.* **зерновы́е** *мн.* бөртөклөләр, иген, бөртөклө ашлыҡ; **убо́рка зерновы́х** игенде урып-йыйыу

**ЗЕРНОДРОБИ́ЛКА** *ж* орлоҡ ярғыс (ваҡлағыс) машина

**ЗЕРНОДРОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое орлоҡ ярғыс; **зернодроби́льная маши́на** орлоҡ ярғыс машина

**ЗЕРНООЧИСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иген таҙартыу ...ы, ашлыҡ таҙартыу ...ы; **зерноочисти́тельные маши́ны** иген таҙартыу машиналары

**ЗЕРНОПОГРУ́ЗЧИК** *м* иген тейәгес (*машина*)

**ЗЕРНОСОВХО́З** *м* игенселек совхозы

**ЗЕРНОСУШИ́ЛКА** *ж* **1.** иген (орлоҡ, ашлыҡ) киптереү урыны **2.** иген (орлоҡ, ашлыҡ) киптергес (*машина*)

**ЗЕРНОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое иген урып-йыйыу ...ы; **зерноубо́рочные рабо́ты** иген урып-йыйыу эштәре

**ЗЕРНОУЛОВИ́ТЕЛЬ** *м* иген тотҡос (*комбайнда*)

**ЗЕРНОФУРА́Ж** *ж* иген фуражы (*мал өсөн*)

**ЗЕРНОХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* иген һаҡлағыс, иген һаҡлау урыны

**ЗЕРНОЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *зоол.* орлоҡ ашаусы, иген менән туҡланыусы (*коштар һәм хайуандар*)

**ЗЕТ** *м* **1.** зет (*латин алфавитында һуңғы хәреф атамаһы*) **2.** *мат.* билдәһеҙ дәүмәл

**ЗЕФИ́Р** *м* **1.** *трад.-поэт.* йомшаҡ (йылы) ел **2.** зефир (*туҡыма*); **соро́чка из зефи́ра** зефир күлдәк **3.** зефир, күбек (*пастила төрө*)

**ЗЕФИ́РОВЫЙ,** -ая, -ое зефир ...ы; **зефи́ровая руба́шка** зефир күлдәк

**ЗИГЗА́Г** *м* **1.** һыныҡ (кәкре) һыҙыҡ, кәкерсәк; **начерти́ть зигза́г** кәкерсәк һыҙыу **2.** *в знач. нареч.* **зигза́гом**; **зигза́гами** кәкерсәкләнеп, кәкерсәкләп

**ЗИГЗАГООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое кәкерсәкле, кәкре; **зигзагообра́зная ли́ния** кәкре һыҙыҡ

**ЗИ́ЖДИТЬСЯ** *несов. на чём*; *книжн.* нигеҙләнеү, таяныу, ҡоролоу; **мне́ние должно́ зи́ждиться на зна́ниях** фекер белемгә нигеҙләнергә тейеш

**ЗИМА́** *ж* ҡыш; **сне́жная зима́** ҡарлы ҡыш; **суро́вая зима́** һыуыҡ ҡыш ♦ **зиму́ и ле́то** йәйен-ҡышын, һәр ваҡыт

**ЗИ́МНИЙ,** -яя, -ее ҡышҡы; **зи́мний день** ҡышҡы көн; **зи́мняя оде́жда** ҡышҡы кейем

**ЗИ́МНИК** *м* ҡышҡы юл; **прое́хать по зи́мнику** ҡышҡы юлдан үтеү

**ЗИМОВА́ТЬ** *несов.* ҡышлау, ҡыш сығыу; **зимова́ть в дере́вне** ауылда ҡышлау ♦ **показа́ть, где ра́ки зиму́ют** *кому* күрмәгәнен күрһәтеү

**ЗИМО́ВКА** *ж* **1.** ҡышлау, ҡышлатыу; **зимо́вка скота́** мал ҡышлатыу; **подгото́вка к зимо́вке** ҡышлауға әҙерлек **2.** (*место*) ҡышлау, ҡышлаҡ; **забро́шенная зимо́вка** ташландыҡ ҡышлау

**ЗИМО́ВНИК** *м*; *пчел.* ҡышлау өйө, умарта өйө

**ЗИМО́ВЩИК** *м* ҡышлаусы

**ЗИМО́ВЬЕ** *с* **1.** ҡышлау, ҡыш сығыу **2.** *см.* **зимо́вка** 2

**ЗИМОГО́Р** *м*; *обл.* зимагор, берәҙәк; **стать зимого́ром** берәҙәккә әйләнеү

**ЗИМО́Й** и **ЗИМО́Ю** *нареч.* ҡышын, ҡыш көнө; **зимо́й и ле́том одни́м цве́том** йәйен-ҡышын бер төҫлө

**ЗИМОРО́ДОК** *м* боҙ тишкес (*ҡош*)

**ЗИМОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое ҡышлыҡлы, һыуыҡҡа (ҡышҡа) сыҙам(лы); **зимосто́йкие сорта́ я́блонь** алманың ҡышҡа сыҙам төрҙәре

**ЗИМОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* ҡышлыҡлылыҡ, һыуыҡҡа сыҙамлыҡ; **зимосто́йкость расте́ний** үҫемлектәрҙең һыуыҡҡа сыҙамлығы

**ЗИПУ́Н** *м* сәкмән, әрмәк

**ЗИЯ́НИЕ** *с см.* **зия́ть**

**ЗИЯ́ТЬ** *несов.*; *книжн.* өңрәйеү, өңрәйеп (асылып) тороу (*соҡор, яра һ.б. ҡарата*)

**ЗЛА́КИ** *мн.*; *бот.* ҡыяҡлылар, башаҡлылар; **хле́бные зла́ки** башаҡлылар, иген культуралары

**ЗЛА́КОВЫЙ,** -ая, -ое ҡыяҡлы, башаҡлы; **зла́ковые расте́ния** ҡыяҡлы үҫемлектәр

**ЗЛА́ТО** *с*; *трад.-поэт.* алтын

**ЗЛАТО́Й,** -ая, -ое *трад.-поэт.* алтын, алтындан яһалған

**ЗЛАТОКУ́ДРЫЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт.* һары бөҙрә сәсле, алтын сәс

**ЗЛАТОУ́СТ** *м*; *шутл.*, *ирон.* таҫма тел, татлы тел

**ЗЛА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое уңдырышлы ♦ **зла́чное ме́сто** *шутл.*, *ирон.* кәйеф-сафа ҡороу (типтереү) урыны

**ЗЛЕТЬ** *несов.*; *разг.* асыуланыу, асыулыға әйләнеү, ҡыҙыу

**ЗЛИТЬ** *несов. кого* асыуландырыу, асыу килтереү (ҡабартыу), ҡотортоу; **злить соба́ку** этте ҡотортоу

**ЗЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *на кого-что* асыуланыу, асыу килеү (ҡабарыу), зәһәрләнеү; **зли́ться на шалуна́** шаян балаға асыуланыу **2.** *перен.* ҡотороноу, тулау; **выо́га зли́тся** буран ҡоторона

**ЗЛО** *с* **1.** яуызлыҡ, уҫаллыҡ, яманлыҡ; **боро́ться со злом** яуызлыҡҡа ҡаршы тороу **2.** бәлә, ҡаза, афәт, бәхетһеҙлек; **из двух зол выбира́ть ме́ньшее** ике бәләнең бәләкәйерәген һайлау **3.** *прост.* асыу, асыу тойғоһо; **зло берёт** асыу килә; **со зла́** асыуҙан; **сорва́ть зло** *на ком-л.* кемгәлер асыуҙы төшөрөү, асыу итеп эшләү ♦ **употреби́ть во зло** яуызлыҡ өсөн файҙаланыу

**ЗЛО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "яуыз", "яуызлыҡ" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **зложела́тель** яуызлыҡ теләүсе; **злонра́вный** яуыз холоҡло

**ЗЛО́БА** *ж* асыу, кенә, ҡарыу; **затаи́ть зло́бу** асыу һаҡлау; **по зло́бе** асыуҙан ♦ **зло́ба дня** көн үҙәгендәге, мөһим

**ЗЛО́БНЫЙ,** -ая, -ое уҫал, асыулы, яуыз; **зло́бный взгляд** уҫал ҡараш; **зло́бный враг** яуыз дошман

**ЗЛОБОДНЕ́ВНОСТЬ** *ж* әһәмиәтлек, мөһимлек; **злободне́вность вопро́са** мәсьәләнең мөһимлеге

**ЗЛОБОДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое бик әһәмиәтле, мөһим, көн үҙәгендә торған; **злободне́вная пробле́ма** бик әһәмиәтле проблема

**ЗЛО́БСТВОВАТЬ** *несов.* уҫалланыу, уҫаллыҡ күрһәтеү, асыу сығарыу

**ЗЛОВЕ́ЩИЙ,** -ая, -ее ҡурҡыныс, дәһшәтле, шомло; **злове́щий вид** ҡурҡыныс ҡиәфәт; **злове́щая тишина́** шомло тынлыҡ

**ЗЛОВО́НИЕ** *с* һаҫыҡ (яман) еҫ, һаҫыҡ, насар еҫ

**ЗЛОВРЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое яуыз уйлы, уҫал ниәтле, мәкерле, ҡара эсле; **зловре́дный челове́к** ҡара эсле кеше; **зловре́дные наме́рения** мәкерле ниәттәр

**ЗЛОДЕ́Й** *м* и **ЗЛОДЕ́ЙКА** *ж* яуыз, яуыз йән

**ЗЛОДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое **1.** яуыз, яуыздарса; **злоде́йское уби́йство** яуыздарса үлтереү **2.** уҫал, мәкерле; **злоде́йская улы́бка** мәкерле йылмайыу

**ЗЛОДЕ́ЙСТВО** *с* уҫаллыҡ, яуызлыҡ; **соверши́ть злоде́йство** яуызлыҡ ҡылыу

**ЗЛОДЕ́ЙСТВОВАТЬ** *несов.* уҫаллыҡ эшләү, яуызлыҡ ҡылыу

**ЗЛОДЕЯ́НИЕ** *с см.* **злоде́йство**; **не допуска́ть злодея́ния** яуызлыҡҡа юл ҡуймау

**ЗЛОЖЕЛА́НИЕ** *с* насар теләк, ҡәһәр

**ЗЛОЙ,** -ая, -ое **1.** уҫал, асыулы; **злой челове́к** уҫал кеше; **злы́е глаза́** уҫал күҙҙәр; **зла́я соба́ка** уҫал эт; **быть злым** асыулы булыу **2.** яуыз, яман; **злой у́мысел** яуыз уй; **зло́е чу́вство** яман (асыулы) тойғо **3.** насар, яман; **зло́е вре́мя** насар ваҡыт; **злой неду́г** яман ауырыу **4.** *разг.* (*едкий, острый*) әсе, ҡаты, көслө; **злой пе́рец** әсе борос; **злой моро́з** әсе һыуыҡ **5.** *перен.* (*язвительный*) әсе, уҫал; **зла́я кри́тика** уҫал тәнҡит ♦ **злой дух** ен, шайтан; **злы́е языки́** әсе телдәр, ғәйбәтселәр

**ЗЛОКА́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *мед.* яман; **злока́чественная о́пухоль** яман шеш

**ЗЛОКЛЮЧЕ́НИЕ** *с* бәлә, ҡаза, бәхетһеҙлек; **терпе́ть злоключе́ния** бәлә-ҡазаға тарыу

**ЗЛОНАМЕ́РЕННОСТЬ** *ж*; *книжн.* уҫал (яуыз) ниәт

**ЗЛОНАМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* уҫал ниәтле, уҫал (яуыз) ниәт менән эшләнгән; **злонаме́ренный посту́пок** уҫал ниәт менән эшләнгән эш

**ЗЛОНРА́ВИЕ** *с*; *уст.* уҫаллыҡ, яуыз ҡылыҡлылыҡ

**ЗЛОНРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* уҫал (яуыз) холоҡло; **злонра́вный челове́к** яуыз холоҡло кеше

**ЗЛОПА́МЯТНОСТЬ** *ж* эскерлелек, кенәселлек, ҡара эслелек

**ЗЛОПА́МЯТНЫЙ,** -ая, -ое эскерле, кенәсел, ҡара эсле, кенә ҡыуыусан; **злопа́мятный челове́к** кенәсел кеше

**ЗЛОПА́МЯТСТВО** *с см.* **злопа́мятность**

**ЗЛОПОЛУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неудачливый*) бәхетһеҙ, уңмаған **2.** бәләле, уңышһыҙ; **злополу́чный день** уңышһыҙ көн

**ЗЛОПЫХА́ТЕЛЬ** *м* асыу сәсеүсе, яуыз уйлы кеше

**ЗЛОПЫХА́ТЕЛЬСТВО** *с* асыу тотоусанлыҡ, яуызлыҡ

**ЗЛОПЫХА́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.* асыу сәсеү, яуызлыҡ ҡылыу, этләшеү

**ЗЛОРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое үсле, кеше ҡайғыһына һөйөнгән; **злора́дное чу́вство** үсәү тойғоһо; **злора́дный смех** кеше ҡайғыһына ҡыуанып көлөү

**ЗЛОРА́ДСТВО** *с* үслелек, үс, үсәү; **чу́вство злора́дства** үс тойғоһо

**ЗЛОРА́ДСТВОВАТЬ** *несов.* үсәү, үсәшеү; **злора́дствовать без по́вода** сәбәпһеҙгә үсәү

**ЗЛОСЛО́ВИЕ** *с* яман теллелек, ғәйбәт, яман ауыҙ; **предава́ться злосло́вию** яман теллелеккә һалышыу, яман теллегә әйләнеү

**ЗЛОСЛО́ВИТЬ** *несов.* яман телләнеү, яманат һатыу, ғәйбәт сәсеү

**ЗЛО́СТНО** *нареч.* уҫал ниәт менән; **зло́стно наруша́ть дисципли́ну** уҫал ниәт менән тәртип боҙоу

**ЗЛО́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҫал, яуыз; **зло́стное наме́рение** уҫал ниәт **2.** уҫаллыҡ менән эшләнгән, үтә уҫал; **зло́стный престу́пник** үтә уҫал енәйәтсе

**ЗЛОСТЬ** *ж* уҫаллыҡ, асыу, яуызлыҡ; **говори́ть со зло́стью** асыу менән һөйләү; **побледне́ть от зло́сти** асыуҙан ағарыныу

**ЗЛОСЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое бәхетһеҙ, бәхете булмаған; **злосча́стная любо́вь** бәхетһеҙ мөхәббәт

**ЗЛО́ТЫЙ** *м* злотый (*Польша аҡса берәмеге*)

**ЗЛОУМЫ́ШЛЕННИК** *м* енәйәтсе, уҫал ниәтле кеше

**ЗЛОУМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* енәйәтсел, уҫал ниәт менән эшләнгән; **злоумы́шленный посту́пок** уҫал ниәт менән эшләнгән (ҡылынған) эш

**ЗЛОУПОТРЕБИ́ТЬ** *сов. чем* **1.** -ға/-гә хыянат итеү; **злоупотреби́ть дове́рием** ышанысҡа хыянат итеү, ышанысты аҡламау **2.** урынһыҙ (артыҡ) файҙаланыу; **злоупотреби́ть вла́стью** властан артыҡ файҙаланыу; **злоупотреби́ть цита́тами** өҙөмтәләрҙе артыҡ файҙаланыу

**ЗЛОУПОТРЕБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **злоупотреби́ть 2.** енәйәт, енәйәти эш; **фина́нсовые злоупотребле́ния** финанс енәйәттәре; **вскрыть злоупотребле́ния** енәйәти эштәрҙе асыу

**ЗЛОУПОТРЕБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **злоупотреби́ть**

**ЗЛОЯЗЫ́ЧИЕ** *с*; *уст.* уҫал (әсе) теллелек, ғәйбәт

**ЗЛОЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* уҫал (әсе) телле; **злоязы́чный челове́к** уҫал телле кеше

**ЗЛЮ́КА** *м* и *ж*; *разг.* асыулы (уҫал, зәһәр) кеше

**ЗЛЮ́ЧКА** *м* и *ж*; *разг. см.* **злю́ка**

**ЗЛЮ́ЩИЙ,** -ая, -ее *разг.* бик уҫал, үтә яуыз

**ЗМЕЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое йылан һымаҡ, уралып торған, уралмалы; **змееви́дная тру́бка** уралмалы көпшә

**ЗМЕЕВИ́К** *м* **1.** (*изогнутая труба*) уралма торба (*һыу, пар ҡыуа торған*) **2.** змеевик (*төҫлө таш*) **3.** *бот.* бүре тырнағы

**ЗМЕЁНЫШ** *м* **1.** йылан балаһы, бала йылан **2.** *прост., бран.* йылан балаһы (*әрләү һүҙе*)

**ЗМЕИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** йылан ...ы; **змеи́ная ко́жа** йылан ҡауы; **змеи́ный яд** йылан ағыуы **2.** *перен.* зәһәр(ле), мәкерле, ағыулы; **змеи́ная улы́бка** мәкерле йылмайыу ♦ **змеи́ная му́дрость** зирәк һәм хәйләле аҡыл

**ЗМЕИ́ТЬСЯ** *несов.* боролоп-боролоп барыу, бормаланып ятыу; **ре́чка змеи́лась меж скал** йылға ҡаялар араһынан бормаланып аға ине

**ЗМЕЙ** *м* **1.** *уст., прост. см.* **змея́** **2.** *миф.* аждаһа **3.** ҡағыҙ осорғос (*балалар уйынсығы*); **запусти́ть змея́** ҡағыҙ осорғос ебәреү

**ЗМЕ́ЙКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **змея́** **2.** *с.-х.* иген таҙартҡыс ҡоролма (*бормалы-бормалы юлаҡтар менән*)

**ЗМЕ́ЙКОВЫЙ: зме́йковый аэроста́т** оҙонса таҡма аэростат

**ЗМЕЯ́** *ж* **1.** йылан; **грему́чая змея́** шалтырауыҡлы йылан; **очко́вая змея́** күҙлекле йылан; **ядови́тые зме́и** ағыулы йыландар **2.** *перен.* йылан (*мәкерле кеше хаҡында*) ♦ **змея́ подколо́дная** ҡара йылан (*мәкерле, яуыз кеше хаҡында*); **змею́ на груди́ отогре́ть (пригре́ть)** ҡуйында йылан аҫырау (*файҙа күреп, зыян эшләгән кешегә ҡарата әйтелә*)

**ЗМИЙ** *м*; *книжн., уст. см.* **зме́й** 1, 2 ♦ **до зелёного зми́я (допи́ться)** лаяҡыл эсеү, ләх булғансы эсеү

**ЗНАК** *м* **1.** билдә; **вопроси́тельный знак** *грам.* һорау билдәһе; **знак ра́венства** *мат.* тигеҙлек билдәһе; **зна́ки препина́ния** *грам.* тыныш билдәләре; **в знак дру́жбы** дуҫлыҡ билдәһе итеп **2.** тамға, келәймә, билдә; **знак ка́чества** сифат билдәһе; **фабри́чный знак** фабрика тамғаһы **3.** эҙ, билге; **знак уши́ба** һуғылған эҙ **4.** *см.* **знačо́к** 1; **университе́тский знак** университет знагы **5.** ым, ишара; **пода́ть знак** ишара итеү (яһау); **звать зна́ками** ым менән саҡырыу ♦ **водяны́е зна́ки** күҙгә күренмәҫ билдәләр, һыу билдәләре (*ҡайһы бер ҡағыҙ төрҙәрендә яҡтыға ҡарағас ҡына күренә торған тамға*); **в знак** *чего ниҙер* йөҙөнән; **в знак па́мяти** иҫтәлек йөҙөнән, иҫтәлеккә; **зна́ки отли́чия** ҡаһарманлыҡ билдәләре (*миҙал һәм ордендар*); **зна́ки разли́чия** дәрәжә билдәләре (*значок, погон, петлица һ.б.*); **знак почто́вой опла́ты** почта түләме билдәһе; **пода́ть знак** белдереү, иҫкәртеү; **под зна́ком** *чего ниҙеңдер* билдәһе аҫтында; **ста́вить знак ра́венства** *между кем-чем* бер тигеҙ баһалау, тигеҙ күреү

**ЗНАКО́МИТЬ** *несов. кого-что, с кем-чем* таныштырыу; **знако́мить с де́лом** эш менән таныштырыу; **знако́мить с дру́гом** дуҫ менән таныштырыу

**ЗНАКО́МИТЬСЯ** *несов. с кем-чем* танышыу; **знако́миться с но́выми сотру́дниками** яңы хеҙмәткәрҙәр менән танышыу; **знако́миться с обстано́вкой** (урындағы) хәл менән танышыу

**ЗНАКО́МСТВО** *с* **1.** (*отношения между людьми, установление общения*) танышлыҡ, танышыу; **возобнови́ть знако́мство** танышлыҡты яңынан башлау (яңыртыу); **порва́ть знако́мство** танышлыҡты өҙөү **2.** (*круг знакомых*) таныштар, таныш-белештәр; **интере́сные знако́мства** ҡыҙыҡ таныштар **3.** (*наличие знаний*) таныш булыу, танышыу, белеү; **знако́мство с исто́рией** тарих менән таныш булыу ♦ **по знако́мству (сде́лать, устро́ить)** танышлыҡ менән (эшләү); **ша́почное знако́мство** былай ғына танышлыҡ

**ЗНАКО́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** таныш, билдәле; **знако́мая пе́сня** таныш йыр; **знако́мый по́черк** таныш ҡул (яҙыу) **2.** *с чем* таныш; **знако́мый с мо́рем** диңгеҙ менән таныш **3.** *в знач. сущ.* **знако́мый** *м* и **знако́мая** *ж* таныш, белеш; **мой знако́мый** минең танышым

**ЗНАМЕНА́ТЕЛЬ** *м*; *мат.* знаменатель, бүлеүсе ♦ **привести́ к одному́ (о́бщему) знамена́телю** *шутл.* тигеҙләү, оҡшаш (бик яҡын) итеү

**ЗНАМЕНА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әһәмиәтле, мөһим; **знамена́тельное собы́тие** әһәмиәтле ваҡиға **2.** *лингв.* үҙ аллы; **знамена́тельные слова́** үҙ аллы һүҙҙәр

**ЗНА́МЕНИЕ** *с*; *книжн., уст.* билдә ♦ **зна́мение вре́мени** *книжн.* дәүерҙең иң мөһим күренеше, заман күренеше

**ЗНАМЕНИ́ТОСТЬ** *ж* **1.** арҙаҡлылыҡ, данлыҡлы булыуы, данлылыҡ, танылған булыу; **знамени́тость писа́теля** яҙыусының данлыҡлы булыуы **2.** атаҡлы (данлыҡлы) кеше; **стать знамени́тостью** атаҡлы кешегә әйләнеү

**ЗНАМЕНИ́ТЫЙ,** -ая, -ое атаҡлы, данлыҡлы, танылған; **знамени́тый писа́тель** атаҡлы яҙыусы

**ЗНАМЕНОВА́ТЬ** *несов. что*; *книжн.* белдереү, билдәле булып тороу, күрһәтеү, күрһәтеп тороу; **э́то собы́тие знамену́ет побе́ду** был ваҡиға еңеүҙе белдерә

**ЗНАМЕНО́СЕЦ** *м* байраҡсы, байраҡ йөрөтөүсе; **быть знамено́сцем** байраҡсы булыу

**ЗНАМЁНЩИК** *м* байраҡсы; **знамёнщик полка́** полктың байраҡсыһы

**ЗНА́МЯ** *с* байраҡ, әләм; **зна́мя респу́блики** республика байрағы; **национа́льное зна́мя** милли байраҡ; **полково́е зна́мя** полк байрағы ♦ **высоко́ держа́ть зна́мя** *чьё* (*чего*) байраҡты юғары тотоу; **подня́ть зна́мя** *чего* байраҡ күтәреү (*берәй күтәрелеш башында тороп, көрәш башлау*); **стать (встать) под зна́мя (знамёна)** *кого-чего кемдеңдер* яғында тороп, көрәшкә әҙер булыу;

**под зна́менем** *чего* байрағы аҫтында (етәкселегендә)

**ЗНА́НИЕ** *с* **1.** белеү, мәғлүмәтлелек; **хоро́шее зна́ние предме́та** предметты яҡшы белеү; **зна́ние языка́** телде белеү **2.** фән, ғилем; **ва́жная о́бласть зна́ния** фәндең мөһим өлкәһе **3.** *обычно мн.* **зна́ния** белем; **облада́ть зна́ниями** белемгә эйә булыу; **получи́ть про́чные зна́ния** төплө белем алыу

**ЗНА́ТНОСТЬ** *ж* атаҡлылыҡ, дәрәжәлелек, затлылыҡ, күренеклелек, танылғанлыҡ; **горди́ться зна́тностью ро́да** затының атаҡлылығы менән ғорурланыу; **дости́чь зна́тности** күренеклелеккә өлгәшеү

**ЗНА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** атаҡлы, күренекле, танылған; **зна́тный механиза́тор** атаҡлы механизатор **2.** аҡһөйәк, затлы нәҫел, арҙаҡлы, юғары ҡатлам; **зна́тный род** затлы нәҫел; **зна́тные лю́ди** юғары ҡатлам кешеләре

**ЗНАТО́К** *м* яҡшы белеүсе, оҫта; **знато́к своего́ де́ла** үҙ эшен яҡшы белеүсе; **знато́к литерату́ры** әҙәбиәтте яҡшы белеүсе

**ЗНАТЬ I** *несов.* **1.** *кого-что, о ком-чём* белеү; **знать уро́к** дәресте белеү; **знать о боле́зни** ауырыу хаҡында белеү; **знать язы́к** тел белеү **2.** *кого* таныу, белеү; **знать с де́тства** *кого-л. кемделер* бала саҡтан уҡ белеү **3.** *что* татыу, баштан үткәреү, кисереү; **он в де́тстве знал мно́го ра́достей** ул бала сағында күп шатлыҡ кисергән; **не знать поко́я** тынғы белмәү **4.** *во* 2 *л. наст. вр.* **зна́ешь (зна́ете)** *в знач. вводн. сл.* беләһеңме (беләһегеҙме) ♦ **дать знать** белгертеү, хәбәр итеү; **знай на́ших** *прост.* күрҙегеҙме беҙҙе, бына беҙ кем; **знать все ходы́ и вы́ходы** эштең әмәлен, яйын яҡшы белеү; **знать ме́ру** сама белеү; **знать не зна́ю** белмәйем дә күрмәйем; **знать доро́гу** юлын (әмәлен, яйын) белеү; **знать себе́ це́ну** үҙ баһаңды белеү; **знать своё ме́сто** үҙ урыныңды белеү, үҙеңде тыйнаҡ тотоу; **знать толк** *в чём* рәтен белеү; **знать це́ну** *кому-чему* ҡәҙерен белеү; **кто его́ зна́ет** кем белә, шайтан белһен; **не знать, куда́ дева́ться** ҡайҙа ҡасырға урын тапмау, керергә тишек тапмау; **не знать, куда́ глаза́ деть** күҙҙе йәшереү (*оялыуҙан, уңайһыҙланыуҙан*); **не знать, куда́ себя́ деть** үҙеңә урын тапмау; **как знать** кем белә, әллә эле (*икеләнеү белдергәндә*); **на́до (пора́) и честь знать** китергә ваҡыт

**ЗНАТЬ II** *ж* аҡһөйәктәр, юғары ҡатлам

**ЗНА́ТЬСЯ** *несов. с кем-чем*; *разг.* аралашыу, ҡатнашыу, белеү; **он ни с кем не хо́чет зна́ться** ул бер кем менән дә аралашырға теләмәй

**ЗНА́ХАРСКИЙ,** -ая, -ое имсе …ы, им-томсы …ы, имселек …ы; **зна́харские приёмы лече́ния** дауалауҙың имселек ысулдары

**ЗНА́ХАРСТВО** *с* имселек, им-томсолоҡ, бағымсылыҡ; **занима́ться зна́харством** им-томсолоҡ менән шөғөлләнеү

**ЗНА́ХАРЬ** *м* и **ЗНА́ХАРКА** *ж* имсе, им-том итеүсе, бағымсы

**ЗНА́ЧАЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **зна́чить 2.** *прил.* мәғәнәле, әһәмиәтле; **зна́чащие элеме́нты ре́чи** телмәрҙең мәғәнәле өлөштәре

**ЗНАЧЕ́НИЕ** *с* **1.** мәғәнә; **значе́ние сло́ва** һүҙҙең мәғәнәһе; **прямо́е значе́ние** тура мәғәнә; **перено́сное значе́ние** күсмә мәғәнә **2.** әһәмиәт, мөһимлек; **истори́ческое значе́ние** тарихи әһәмиәт; **полити́ческое значе́ние** сәйәси әһәмиәт; **вопро́с междунаро́дного значе́ния** халыҡ-ара әһәмиәте булған мәсьәлә

**ЗНА́ЧИМОСТЬ** *ж* **1.** мәғәнәлелек; **зна́чимость сло́ва** һүҙҙең мәғәнәлелеге **2.** әһәмиәтлелек, мөһимлек; **обще́ственная зна́чимость** *чего-л. нимәнеңдер* ижтимағи әһәмиәтлелеге

**ЗНА́ЧИМЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәғәнәле, мәғәнәгә эйә булған; **зна́чимая часть сло́ва** һүҙҙең мәғәнәле өлөшө **2.** әһәмиәтле, мөһим; **зна́чимое явле́ние** әһәмиәтле күренеш

**ЗНА́ЧИТ** *вводн. сл.*; *разг.* (*следовательно, стало быть*) тимәк, шулай булғас; **зна́чит, на́до вы́ступить** тимәк, сығыш яһарға кәрәк

**ЗНАЧИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* **1.** байтаҡ, хәтһеҙ, шаҡтай; **значи́тельно облегчи́ть труд** хеҙмәтте байтаҡ еңеләйтеү **2.** (*при сравнит. ст. в значении "в большей степени", "гораздо"*) байтаҡҡа, хәтһеҙгә; **значи́тельно быстре́е** байтаҡҡа тиҙерәк; **значи́тельно про́ще** байтаҡҡа ябайыраҡ

**ЗНАЧИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** байтаҡ (хәтһеҙ) ҙур булыу, дәүмәллелек; **значи́тельность объёма** күләмдең дәүмәллелеге **2.** әһәмиәтлелек, мөһимлек; **значи́тельность собы́тия** ваҡиғаның әһәмиәтлелеге

**ЗНАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** байтаҡ (хәтһеҙ) ҙур, ҙур ғына; **значи́тельное расстоя́ние** байтаҡ ҙур ара **2.** (*важный*) әһәмиәтле, мөһим; **значи́тельное сло́во** мөһим һүҙ; **игра́ть значи́тельную роль** мөһим роль уйнау **3.** (*выразительный*) мәғәнәле; **значи́тельный взгля́д** мәғәнәле ҡараш

**ЗНА́ЧИТЬ** *несов.* **1.** *что* (*означать — о словах, знаках, жестах и т.п.*) аңлатыу, белдереү; **э́то мно́го зна́чит** был күп нәмә аңлата; **по-ру́сски э́то зна́чит** урыҫса был шуны аңлата **2.** (*иметь значение*) мөһим булыу, әһәмиәтле булыу; **ва́ше отноше́ние мно́го зна́чит** һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙ ҙур әһәмиәткә эйә ♦ **ничего́ не зна́чить** әһәмиәте булмау

**ЗНА́ЧИТЬСЯ** *несов.* һаналыу, иҫәпләнеү, тороу; **зна́читься в спи́ске** исемлектә тороу

**ЗНАЧКИ́СТ** *м* и **ЗНАЧКИ́СТКА** *ж* значок йөрөтөүсе, значокка эйә булыусы, значоклы; **значки́ст ГТО** ГТО значогын йөрөтөүсе

**ЗНАЧО́К** *м* **1.** значок; **нагру́дный значо́к** түш значогы; **университе́тский значо́к** университет значогы; **носи́ть значо́к** значок йөрөтөү **2.** билдә; **математи́ческий значо́к** математик билдә; **значки́ на поля́х кни́ги** китап битенә ҡуйылған билдәләр

**ЗНА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **знать** I; **2.** *прил.* белемле, мәғлүмәтле; **зна́ющий инжене́р** белемле инженер

**ЗНОБИ́ТЬ** *несов. кого безл.* өшөтөү, өшөттөрөү, ҡалтыратыу; **меня́ зноби́т** өшөттөрә

**ЗНОЙ** *м* эҫелек, томра; **полу́денный зной** көн үҙәгендәге эҫелек

**ЗНО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бик эҫе, томра; **зно́йный день** томра көн **2.** *перен.* дәртле, ялҡынлы; **зно́йная любо́вь** ялҡынлы мөхәббәт

**ЗОБ** *м* **1.** (*у птиц*) бөрләтәү; (*у человека*) боғаҡ **2.** (*болезнь*) боғаҡ шешеү, базед ауырыуы (зоб)

**ЗОБА́СТЫЙ,** -ая, -ое (*о птицах*) ҙур бөрләтәүле; (*о человеке*) ҙур боғаҡлы; **зоба́стые го́луби** ҙур бөрләтәүле күгәрсендәр

**ЗО́БНЫЙ,** -ая, -ое боғаҡ ...ы; **зо́бная о́пухоль** боғаҡ шеше

**ЗОВ** *м* **1.** (*призывный звук*) саҡырыу тауышы, өндәү, оран; **откли́кнуться на зов** өндәүгә яуап ҡайтарыу **2.** *разг.* (*приглашение*) саҡырыу, өндәшеү; **прийти́ по пе́рвому зо́ву** беренсе саҡырыуға уҡ килеү

**ЗОДИА́К** *м*; *астр.* зодиак (*Ҡояш юлында теҙелгән ун ике йондоҙлоҡ*) ♦ **зна́ки зодиа́ка** *астр.* зодиак тамғалары (*Ҡояш юлында теҙелгән ун ике йондоҙлоҡтоң исеме*)

**ЗОДИАКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *астр.* зодиак ...ы, зодиакаль; **зодиака́льные созве́здия** зодиак йондоҙлоҡтары

**ЗО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое архитектура ...ы, төҙөлөш ...ы; **зо́дческое иску́сство** төҙөлөш сәнғәте

**ЗО́ДЧИЙ** *м* архитектор, төҙөүсе; **при́знанный зо́дчий** танылған төҙөүсе

**ЗОЛА́** *ж* көл; **древе́сная зола́** утын көлө; **выгреба́ть золу́ из пе́чки** мейестән көл алыу

**ЗОЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *спец.* көллө; **золи́стый у́голь** күп көллө күмер

**ЗОЛИ́ТЬ** *несов.*; *спец.* көлләү, көлгә батырыу; **золи́ть шку́ру** тирене көлләү

**ЗОЛО́ВКА** *ж* (*младшая сестра мужа*) ҡәйенһеңле (ҡайынһеңле); (*старшая сестра мужа*) ҡәйенбикә (ҡайынбикә)

**ЗОЛОТА́РНИК** *м* алтынбаш (*күп йыллыҡ үлән*)

**ЗОЛОТА́РЬ** *м*; *уст.* алтынсы, алтын оҫтаһы, зәргәр

**ЗОЛОТЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* алтынланыу, алтынға манылыу (мансылыу), алтын төҫөнә инеү; **ли́стья дере́вьев золоте́ют** ағас япраҡтары алтын төҫөнә инә

**ЗОЛОТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое алтынлау ...ы, алтын ялатыу ...ы; **золоти́льный цех** алтынлау цехы

**ЗОЛОТИ́ЛЬЩИК** *м* зәргәр, алтын ялатыусы

**ЗОЛОТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое алтын һымаҡ, алтын төҫлө, алтындай, алтын ...ы; **золоти́стый ко́лос** алтын башаҡ; **золоти́стые во́лосы** алтын төҫлө сәс

**ЗОЛОТИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*выделяться золотистым цветом*) алтынлау, алтын ялатыу; **золоти́ть ло́жки** ҡалаҡтарға алтын ялатыу **2.** алтынға маныу (мансыу), алтын төҫө биреү; **со́лнце золоти́т верши́ны** ҡояш тау түбәләрен алтынға мансый

**ЗОЛОТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** алтын төҫөнә инеү, һарғайыу, (һарғайып) алтынланыу, нурға мансылыу; **золоти́тся рожь** арыш (алтын төҫөнә инә) һарғая **2.** (*становиться, казаться золотистым*) алтын кеүек һарғайыу, (һарғайып) күренеү, һарғайып ятыу; **вдали́ под луча́ми со́лнца золотя́тся пески́** алыҫта ҡояш нурҙары аҫтында ҡом һарғайып күренә **3.** *страд. от* **золоти́ть** 1

**ЗО́ЛОТКО** *с*; *разг.* алтыным, алтынҡайым (*иркәләү һүҙе*)

**ЗОЛОТНИ́К I** *м* мыҫҡал (*боронғо ауырлыҡ үлсәү берәмеге — 4,26 г*) ♦ **мал золотни́к, да до́рог** алтын ҙур булмай

**ЗОЛОТНИ́К II** *м* золотник (*пар машинаһында пар бүлгес*)

**ЗО́ЛОТО** *с* **1.** (*химический элемент, благородный металл*) алтын; **черво́нное зо́лото** саф алтын **2.** *собир.* (*золотые вещи, изделия*) алтын, алтын нәмәләр; **покупа́ть зо́лото** алтын нәмәләр һатып алыу **3.** *собир.* (*золотые монеты*) алтын аҡса; **плати́ть зо́лотом** алтын аҡса менән түләү **4.** (*позолоченные нити*) алтын еп; **шить зо́лотом** алтын еп менән сигеү (тегеү) **5.** *перен., разг.* алтын; **зо́лото челове́к** алтын кеше ♦ **бе́лое зо́лото** аҡ алтын (*мамыҡ*); **на вес зо́лота** алтын хаҡына, алтынға тиң; **купа́ться в зо́лоте** алтынға күмелеү; **чёрное зо́лото** ҡара алтын (*нефть*)

**ЗОЛОТО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "алтын" мәғәнәһендәге тәүге өлөшө, мәҫ.,* **золотомо́йка** алтын йыуыу ҡоролмаһы; **золотогри́вый** алтын яллы

**ЗОЛОТОДОБЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее алтын табыу ...ы; **золотодобыва́ющая промы́шленность** алтын табыу сәнәғәте

**ЗОЛОТОИСКА́ТЕЛЬ** *м* алтын эҙләүсе

**ЗОЛОТОИСКА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое алтын эҙләү ...ы; **золотоиска́тельская па́ртия** алтын эҙләү партияһы

**ЗОЛОТО́Й,** -ая, -ое **1.** алтын ...ы; **золото́е кольцо́** алтын балдаҡ; **золото́й сли́ток** алтын ҡойолма; **золото́й рубль** алтын (бер) һумлыҡ **2.** алтынлы; **золото́й песо́к** алтынлы ҡом **3.** алтын (төҫөндәге); **золоты́е ку́дри** алтын бөҙрә сәс **4.** *перен.* алтын, бик яҡшы, затлы; **золоты́е слова́** алтын һүҙҙәр; **золото́й хара́ктер** алтын холоҡ **5.** *перен.* бәхетле, хозурлы; **золоты́е дни** бәхетле көндәр **6.** *перен.* (*в обращении*) алтыным; **золота́я моя́** алтыным минең **7.** *в знач. сущ.* **золото́й** *м* алтын аҡса ♦ **золота́я молодёжь** кәйеф-сафа ҡороп йәшәүсе йәштәр; **золота́я о́сень** алтын көҙ (*һары япраҡлы, ҡояшлы көҙ*); **золота́я сва́дьба** алтын туй (*бергә йәшәүҙең илле йыллығы*); **золота́я середи́на** урталыҡ (*аҡыл менән уйлап эш итеү хаҡында*); **золото́е дно** бик төшөмлө урын, Әндрәй ҡаҙнаһы; **золото́й век** алтын дәүер (*фәндең, сәнғәттең сәскә атыу осоро*); **золото́й дождь** ҙур табыш, төшөм; **золото́й мешо́к** алтын һандыҡ (*бик бай кеше*); **золото́й фонд**: 1) алтын фонд (*дәүләттең алтын һ.б. хазиналары*); 2) бик ҡәҙерле (*кешеләр төркөмө һ.б., мәҫ., әҙәбиәт, сәнғәт эшмәкәрҙәре*); **золоты́е ру́ки** алтын ҡулдар (*оҫталар*); **золоты́х дел ма́стер** алтын оҫтаһы, зәргәр; **обеща́ть (сули́ть) золоты́е го́ры** алтын тауҙар вәғәҙә итеү (*артыҡ күпкә ышандырыу*)

**ЗОЛОТОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое алтынлы, алтынға бай; **золотоно́сный песо́к** алтынға бай ҡом

**ЗОЛОТОПРОМЫ́ШЛЕННИК** *м* **1.** алтын приискыһы хужаһы **2.** алтын приискыһы эшсеһе

**ЗОЛОТОПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* алтын сәнәғәте

**ЗОЛОТОПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое алтын сәнәғәте ...ы; **золотопромы́шленный райо́н** алтын сәнәғәте районы

**ЗОЛОТОТЫ́СЯЧНИК** *м* һарыгүҙ (*дарыу үләне*)

**ЗОЛОТОШВЕ́ЙКА** *ж* алтын менән ҡайыусы

**ЗОЛОТУ́ХА** *ж*; *уст.* ҡылауыр (*балалар ауырыуы*)

**ЗОЛОТУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*страдающий золотухой*) ҡылауырлы, ҡылауыр менән ауырыған; **золоту́шный ребёнок** ҡылауырлы бала **2.** (*похожий на больного золотухой*) бик хәлһеҙ, әлһерәгән; **золоту́шный челове́к** бик хәлһеҙ кеше

**ЗО́ЛОТЦЕ** *с*; *разг.* алтынсыҡ, алтынсығым (*иркәләү һүҙе*)

**ЗОЛО́ТЧИК** *м* алтынлаусы, алтын ялатыу оҫтаһы; **золо́тчик по де́реву** ағасҡа алтын ялатыу оҫтаһы

**ЗОЛОЧЕ́НИЕ** *с* алтынлау; **золоче́ние ра́мы** рамды (ҡыҫанды) алтынлау

**ЗОЛОЧЁНЫЙ,** -ая, -ое алтын ялатылған, алтынланған; **золочёная ло́жка** алтын ялатылған ҡалаҡ

**ЗО́ЛЬНИК** *м*; *спец.* көллөлөк, көл миҡдары

**ЗО́ЛЬНОСТЬ** *ж*; *спец.* көллөлөк; **зо́льность угля́** күмерҙең көллөлөгө

**ЗО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көл ...ы, көлдән яһалған; **зо́льная ку́ча** көл өйөмө; **зо́льные удобре́ния** көл ашламалары

**ЗО́НА** *ж* зона, өлкә; **аркти́ческая зо́на** арктик зона; **лесна́я зо́на** урман зонаһы; **степна́я зо́на** дала буйы зонаһы; **при́городная зо́на** ҡала яны (эргәһе) зонаһы; **пограни́чная зо́на** сик буйы зонаһы; **зо́на о́тдыха** ял итеү зонаһы

**ЗОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өлкә ...ы, зона ...ы, айырым зонаға хас, зональ; **зона́льная расти́тельность** айырым зонаға хас үҫемлектәр; **зона́льные грани́цы** зона сиктәре; **зона́льные соревнова́ния** зона ярыштары

**ЗОНД** *м* зонд (**1.** *мед. кеше организмынан шыйыҡлыҡ, һут ала торған көпшә* **2.** *һауа шарттарын тикшерә торған шар* **3.** *ер ҡатламдарын тикшереүҙә ҡулланылған прибор*)

**ЗОНДИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* зонд менән тикшереү; **зонди́ровать ра́ну** яраны зонд менән тикшереү **2.** *что*; *перен.* (алдан) һынап ҡарау, самалау ♦ **зонди́ровать по́чву** алдан тикшереп (һынап) ҡарау, ҡылын сиртеп ҡарау

**ЗО́ННЫЙ,** -ая, -ое зона ...ы; **зо́нный тари́ф** зона тарифы

**ЗОНТ** *м* **1.** *см.* **зо́нтик** 1; **2.** (*навес*) япма, лапаҫ, түбә

**ЗО́НТИК** *м* **1.** зонтик, ҡулсатыр; **раскры́ть зо́нтик** ҡулсатырҙы асыу **2.** *бот.* сатыр сәскә

**ЗО́НТИЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сатыр, сатырлы; **зо́нтичный чехо́л** ҡулсатыр тышлығы; **зо́нтичная анте́нна** сатырлы антенна **2.** *в знач. сущ.* **зо́нтичные** *мн.*; *бот.* сатыр сәскәләләр

**ЗОО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "зоология", "зоологик" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **зоогеогра́фия** зоологик география; **зоогигие́на** зоологик гигиена

**ЗОО́ЛОГ** *м* зоология белгесе

**ЗООЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое зоология ...ы, зоологик; **зоологи́ческий музе́й** зоология музейы **2.** *перен.* хайуани, хайуандарса; **зоологи́ческие нра́вы** хайуани ғәҙәттәр

**ЗООЛО́ГИЯ** *ж* зоология (*хайуандар донъяһын өйрәнгән фән*)

**ЗООМАГАЗИ́Н** *м* зоология магазины

**ЗООПА́РК** *м* зоология паркы

**ЗООСА́Д** *м* зоология баҡсаһы

**ЗООТЕ́ХНИК** *м* зоотехник; **рабо́тать зооте́хником** зоотехник булып эшләү

**ЗООТЕ́ХНИКА** *ж* зоотехника (*ауыл хужалығы малдарын үрсетеү, тәрбиәләү тураһындағы фән*)

**ЗООТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое зоотехника ...ы, зоотехник; **зоотехни́ческая лаборато́рия** зоотехник лаборатория

**ЗО́РКИЙ,** -ая, -ое **1.** үткер; **зо́ркие глаза́** үткер күҙҙәр **2.** *перен.* (*проницательный*) зирәк, һиҙгер; **быть зо́рким в дела́х** эштәрҙә һиҙгер булыу

**ЗО́РКОСТЬ** *ж* **1.** үткерлек; **зо́ркость гла́за** күҙҙең үткерлеге **2.** *перен.* зирәклек, һиҙгерлек, уяулыҡ; **развива́ть зо́ркость** һиҙгерлекте үҫтереү

**ЗРА́ЗЫ** *мн.* (*ед.* **зра́за** *ж*) (эсле) ит котлеты; **зра́зы с ри́сом** дөгөлө ит котлеты

**ЗРАЧКО́ВЫЙ,** -ая, -ое күҙ ҡараһы ...ы, бәбәк ...ы; **зрачко́вый нерв** бәбәк нервыһы

**ЗРАЧО́К** *м* күҙ ҡараһы, бәбәк; **расшире́ние зрачка́** күҙ ҡараһының киңәйеүе

**ЗРЕ́ЛИЩЕ** *с* **1.** күренеш; **краси́вое зре́лище** матур күренеш **2.** (*представление*) тамаша; **ма́ссовое зре́лище** күмәк тамаша; **устро́ить зре́лище** тамаша ҡороу

**ЗРЕ́ЛИЩНЫЙ,** -ая, -ое тамаша ...ы; **зре́лищный зал** тамаша залы

**ЗРЕ́ЛОСТЬ** *ж* **1.** (*спелость*) өлгөргәнлек, бешкәнлек, үҫеп етеү; **зре́лость виногра́да** йөҙөмдөң өлгөргәнлеге **2.** етлегеү, балиғ булыу; **наступле́ние зре́лости** балиғ булған, йәше еткән **3.** *чего, какая*; *перен.* өлгөргәнлек, камиллыҡ; **зре́лость мы́сли** фекер камиллығы; **полова́я зре́лость** енси өлгөргәнлек; **аттеста́т зре́лости** өлгөргәнлек аттестаты

**ЗРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** өлгөргән, бешкән; **зре́лые плоды́** бешкән емештәр **2.** етлеккән, балиғ булған, еткән; **зре́лая де́вушка** балиғ булған ҡыҙ **3.** *перен.* тәжрибәле, өлгөрөп еткән; **зре́лый учёный** өлгөрөп еткән ғалим **4.** *перен.* төплө, тәрән (ныҡ) уйланған; **зре́лое реше́ние** төплө ҡарар; **зре́лое произведе́ние** төплө әҫәр

**ЗРЕ́НИЕ** *с* күреү, күреү һәләте; **о́рган зре́ния** күреү ағзаһы; **лиши́ться зре́ния** күреү һәләтен юғалтыу ♦ **под угло́м зре́ния** *каким* ҡараштан сығып, билдәле бер күҙлектән; **по́ле зре́ния**: 1) күҙ күреме; 2) ҡараш; **то́чка зре́ния** ҡараш, фекер

**ЗРЕТЬ I** *несов.* **1.** бешеү, өлгөрөү, етешеү; **зре́ют хлеба́** игендәр өлгөрә; **я́блоки зре́ют** алмалар бешә **2.** *перен.* нығыныу, үҫеп етеү өлгөрөү; **мысль зре́ет** фекер өлгөрөүе

**ЗРЕТЬ II** *несов. кого-что*; *книжн.*, *уст.* ҡарау, ҡарап тороу

**ЗРИ́МЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** *прич. от* **зреть** II; **2.** *прил.* күренеп торған, күренгән, күҙ алдындағы; **зри́мое простра́нство** күренеп торған арауыҡ **3.** *прил.*; *перен.* һиҙелеп (күҙгә ташланып) торған, һиҙелерлек; **зри́мые черты́** *чего-л.* һиҙелеп торған сифаттар

**ЗРИ́ТЕЛЬ** *м* и **ЗРИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* тамашасы, тамаша (ҡылыусы) итеүсе; **зри́тель собы́тия** ваҡиғаны тамаша ҡылыусы (итеүсе); **зри́тели аплоди́руют** тамашасылар ҡул саба

**ЗРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күреү ...ы; **зри́тельная па́мять** күреү хәтере **2.** тамаша ...ы; **зри́тельный зал** тамаша залы

**ЗРЯ** *нареч.*; *разг.* **1.** файҙаһыҙға, бушҡа, тиккә; **не зря прожи́ть жизнь** бушҡа йәшәмәү **2.** кәрәкһеҙгә, юҡҡа; **зря придира́ться** юҡҡа бәйләнеү ♦ **почём зря** *груб.*, *прост.* бик ныҡ, кәрәгенсә

**ЗРЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее күҙле, күҙе күргән, күрә алған; **зря́чий челове́к** күҙе күргән кеше

**ЗУБ** *м* **1.** (*мн.* **зу́бы**) теш; **коренны́е зу́бы** аҙау тештәр; **моло́чные зу́бы** һөт тештәре; **пере́дние зу́бы** алғы (ҡырҡҡыс) тештәр; **зуб му́дрости** аҡыл теше; **чи́стить зу́бы** теш таҙартыу **2.** (*мн.* **зу́бья**) теш; **зу́бья бороны́** тырма тештәре; **зу́бья пилы́** бысҡы тештәре ♦ **вооружённый до зубо́в** баштан-аяҡ ҡоралланған; **гляде́ть (смотре́ть) в зу́бы** *кому*; *прост.* ауыҙына ҡарап тороу; **держа́ть язы́к за зуба́ми** телде тыйыу, серҙе асмау; **загова́ривать зу́бы** юрамал яңылыштырыу, бутау; **зуб на́ зуб не попада́ет** теше тешкә теймәй (*өшөүҙән*); **зуба́ми держа́ться** *за что*; *прост.* йәбешеп ятыу, ысҡындырмаҫҡа тырышыу; **зу́бы на по́лку класть** мохтажлыҡ кисереү, ауыҙҙы сөйгә элеү (*асығыу*); **име́ть зуб** *на кого* теш ҡайрау; **лома́ть зу́бы** *на чём* муйынды һындырыу; **навя́зло в зуба́х** тәҡәтте ҡоротоу, теңкәгә тейеү, быуынға төшөү; **не по зуба́м** *что*: 1) теш үтмәҫлек ҡаты; 2) теш үтмәү, ҡулдан килмәү; **ни в зуб ного́й** *прост.* бер ни белмәү; **пока́зывать зу́бы**: 1) телләшеү; 2) теш күрһәтеү, иҙрәйеү; **ска́лить зу́бы** теш ыржайтыу (*асыу белдереү*); **сквозь зу́бы (говори́ть, бурчать и т.п.)** теш араһынан (*әйтеү, мығырлау һ.б.*); **сти́снув зу́бы** теш ҡыҫып; **точи́ть зу́бы** теш ҡайрау (*үсләшеп үс алырға ярһыу*)

**ЗУБА́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** эре (үткер) тешле; **зуба́стая щу́ка** үткер тешле суртан **2.** *перен.* әсе (зәһәр) телле, үткер телле; **быть зуба́стым** әсе телле булыу

**ЗУБА́ТКА** *ж* зубатка (*диңгеҙ балығы*)

**ЗУБА́ТЫЙ,** -ая, -ое тешле; **зуба́тый кит** тешле кит

**ЗУБЕ́Ц** *м* **1.** теш; **зубе́ц пилы́** бысҡы теше **2.** *обычно мн.* **зубцы́** сығынты, ҡыйғас; **зубцы́ стены́** стенаның сығынтылары

**ЗУБИ́ЛО** *с* тешәүес, тешле игәү; **руби́ть зуби́лом** тешәүес менән ҡырҡыу

**ЗУБНО́Й,** -ая, -ое **1.** теш ...ы; **зубно́й нерв** теш нервыһы; **зубна́я боль** теш һыҙлау; **зубна́я щётка** теш щеткаһы **2.** *лингв.* теш, теш ...ы; **зубны́е согла́сные** теш тартынҡылары

**ЗУБО́ВНЫЙ: скре́жет зубо́вный** (*злоба*) теш шығырлатыу (*асыуҙан*); **со скре́жетом зубо́вным** теләмәй генә, теш ҡыҫып (*низер эшләү*)

**ЗУБОВРАЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое теш дауалау ...ы; **зубовраче́бный кабине́т** теш дауалау кабинеты

**ЗУБО́К** *м*; *уменьш.-ласк. от* **зуб**; **зу́бки проре́зы́ются** тештәр сыға ♦ **на зубо́к подари́ть (принести́)** бәпес бүләге биреү (*яңы тыуған балаға*); **попа́сть на зубо́к** *кому* теленә эләгеү

**ЗУБОЛЕЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **зубовраче́бный**

**ЗУБОРЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое теш ҡырҡа торған; **зубоpе́зный стано́к** теш ҡырҡа торған станок

**ЗУБОСКА́Л** *м*; *прост.* мыҫҡыллап көлөүсе, теш ыржайтыусы

**ЗУБОСКА́ЛИТЬ** *несов.*; *прост.* ауыҙ йырыу, мыҫҡыл менән көлөү, теш ыржайтыу

**ЗУБОТЫ́ЧИНА** *ж*; *прост.* тешкә тондороу (һуғыу)

**ЗУБОЧИ́СТКА** *ж* теш соҡоғос, һыҙлыҡ

**ЗУБР** *м* **1.** зубр, думбай, ҡыр үгеҙе **2.** *разг.*, *шутл.* үҙ эшенең оҫтаһы, тәжрибәле кеше

**ЗУБРЁЖКА** *ж*; *разг.* (аңламай) ятлау; **занима́ться зубрёжкой** ятлау менән шөғөлләнеү

**ЗУБРИ́ЛА** *м* и *ж*; *разг.* аңламай ятлаусы

**ЗУБРИ́ТЬ I** *несов. что* **1.** *сказ.* (*насекать зубья*) тешәү, игәү, теш яһау (*мәҫ., ураҡҡа*) **2.** (*делать зазубрины*) йөҙөн ҡайтарыу, китеп бөтөү, үтмәҫләү, быҫҡыландырыу; **зубри́ть топо́р** балтаның йөҙөн ҡайтарыу

**ЗУБРИ́ТЬ II** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* (аңламай) ятлау, ятлап өйрәнеү (һөйләү); **зубри́ть стихи́** шиғырҙы ятлау

**ЗУБРИ́ТЬСЯ I** и **ЗУ́БРИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*покрываться зазубринами*) йөҙө ҡайтыу, тупарланыу (*үткер ҡоралдың*) **2.** *страд. от* **зубри́ть** I

**ЗУБРИ́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **зубри́ть** II

**ЗУБРО́ВКА** *ж* **1.** үгеҙут (*ҡыяҡлы үлән*) **2.** зубровка (*шул үлән төнәтмәһе ҡушып эшләнгән араҡы*)

**ЗУБЧА́ТКА** *ж* **1.** тешле тәгәрмәс; **зубча́тка домкра́та** домкраттың тешле тәгәрмәсе **2.** *бот.* теш үләне (*ҡый үләне*)

**ЗУБЧА́ТЫЙ** и **ЗУ́БЧАТЫЙ,** -ая, -ое тешле, күп тешле; **зубча́тое колесо́** тешле тәгәрмәс

**ЗУД** *м* **1.** ҡымырйыу, ҡысыу; **зуд по всему́ те́лу** тотош тән ҡысыу **2.** *перен.*, *разг.* ҡысыныу, ашҡыныу; **зуд любопы́тства** ҡыҙыҡһынып ашҡыныу

**ЗУ́ДЕНЬ** *м* ҡорсаңғы бетсәһе

**ЗУДЕ́ТЬ I** *несов.*; *разг.* ҡымырйыу, ҡысыу; **те́ло зуди́т** тән ҡысый

**ЗУДЕ́ТЬ II** *несов.*; *разг.* **1.** безләү, безелдәү; **комары́ зудя́т** серәкәйҙәр безелдәй **2.** *перен.* (*надоедать*) теңкәгә тейеү, мыжыу

**ЗУЁК** *м* тәтелдәүек (*һыу ҡошо*)

**ЗУЛУ́ССКИЙ,** -ая, -ое зулу ...ы, зулус(тар) ...ы; **зулу́сский язы́к** зулус теле

**ЗУ́ЛУ** *мн. нескл.* зулу; *см.* **зулусы**

**ЗУЛУ́СЫ** *мн.* зулустар (*Көньяҡ Африка Республикаһында йәшәүсе халыҡ*) // **зулу́с** *м* зулус ир-аты; **зулу́ска** *ж* зулус ҡатын-ҡыҙы

**ЗУ́ММЕР** *м* зуммер (*тауыш сигналдары бирә торған прибор*)

**ЗУРНА́** *ж*; *муз.* һорнай (*өрөп уйналған музыка ҡоралы*)

**ЗУРНИ́СТ** *м* һорнайсы

**ЗЫ́БКА** *ж*; *обл.* сәңгелдәк, бишек

**ЗЫ́БКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*о льде, болоте*) бәүелеп (һиңкелдәп) ятҡан; (*о песке, почве*) ишелеп торған; (*о поверхности чего-л.*) сайҡалып (бөҙөрләп) ятҡан; **зы́бкая рожь** сайҡалып ятҡан арыш баҫыуы **2.** *перен.* тотороҡһоҙ, ышанысһыҙ; **зы́бкая причи́на** ышанысһыҙ сәбәп

**ЗЫБУ́Н** *м* **1.** (*трясина*) һаҙлыҡ, упҡын **2.** *обычно мн.* **зыбуны́** (*зыбучие пески*) күсмә ҡом

**ЗЫБЬ** *ж* **1.** бөҙөр, шаҙра, ваҡ тулҡын (*һыу өҫтөндәге*); **лёгкая зыбь** еңелсә бөҙөр **2.** *трад.-поэт.* тулҡын; **зы́би мо́ря** диңгеҙ тулҡындары

**ЗЫ́КНУТЬ** *сов. на кого-что*; *прост.* ҡысҡырып ебәреү, екереп ҡуйыу, ҡаты әйтеү

**ЗЫРЯ́НЕ** *мн.*; *уст.* зыряндар (*комиҙарҙың элекке исеме*) // *ед.* **зыря́нин** *м* зырян ир-аты; **зыря́нка** *ж* зырян ҡатын-ҡыҙы

**ЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое яңғырауыҡлы, көслө, әсе; **зы́чный го́лос** яңғырауыҡлы тауыш

**ЗЮЙД** *м* **1.** *мор.* (*юг*) көньяҡ, көньяҡ йүнәлеш; **держа́ть курс на зюйд** йүнәлеште көньяҡҡа табан тотоу **2.** *мор.*, *метеор.* (*южный ветер*) көньяҡ еле

**ЗЮЙД-ВЕ́СТ** *м* **1.** *мор.* көньяҡ-көнбайыш **2.** *мор.*, *метеор.* көньяҡ-көнбайыш еле

**ЗЮЙД-О́СТ** *м* **1.** *мор.* көньяҡ-көнсығыш **2.** *мор.*, *метеор.* көньяҡ-көнсығыш еле

**ЗЯ́БКИЙ,** -ая, -ое *разг.* өшөмтәл, өшөксән; **зя́бкий челове́к** өшөмтәл кеше; **стать зя́бким** өшөмтәлгә әйләнеү

**ЗЯ́БКО** *разг.* **1.** *нареч.* өшөп, шоҡрайып, өшәнеп; **зя́бко ку́таться в шаль** өшөп шәлгә ураныу **2.** *кому-чему в знач. сказ.*, *безл.* һыуыҡ, һалҡын, өшөтә; **нога́м зя́бко** аяҡҡа һыуыҡ, аяҡты өшөтә

**ЗЯ́БКОСТЬ** *ж* өшөмтәллек, өшөксәнлек; **отлича́ться зя́бкостью** өшөмтәллек менән айырылып тороу

**ЗЯ́БЛЕВЫЙ,** -ая, -ое туңға; **зя́блевая вспа́шка** туңға һөрөү

**ЗЯ́БЛИК** *м* ҡыҙылтүш (*һайрар ҡош*)

**ЗЯ́БНУТЬ** *несов.* **1.** өшөү, өшөргәнеү, туңыу; **нача́ть зя́бнуть** өшөй башлау **2.** *с.-х.* туңыу, өшөү (*үҫемлектәр хаҡында*)

**ЗЯБЬ** *ж* туңға һөрөү, туңға һөрөлгән ер; **се́ять по зя́би** туңға һөрөлгән ергә сәсеү

**ЗЯТЬ** *м* (*муж дочери, младшей сестры и младшей золовки*) кейәү; (*муж старшей сестры и старшей золовки*) еҙнә

# И

**И I** *союз* **1.** *соед.* (*соединяет однородные членов предложения и предложения, представляющие собой однородные сообщения*) һәм, ла/лә, менән; **взро́слые и де́ти** ололар һәм балалар; **заво́ды и фа́брики** заводтар һәм фабрикалар; **догна́ть и перегна́ть** ҡыуып етергә һәм уҙып китергә; **он пришёл и ушёл** ул килде лә китте; **оте́ц и мать** атай менән әсәй

**2.** *соед.* (*соединяет противопоставляемые высказывания*; *иногда в сочетании со словами "тем не менее", "всё же", "однако"*) ләкин, әммә, мәгәр, шулай ҙа; **вса́дники скры́лись, и никто́ э́того не заме́тил** һыбайлылар күҙҙән юғалды, әммә быны берәү ҙә һиҙмәне

**3.** *соед.* (*соединяет предложения, связанные причинно-следственными отношениями*) да/дә, һәм; **вре́мя истекло́, и он прекрати́л рабо́ту** ваҡыт бөттө, һәм ул эшен туҡтатты

**4.** *перечисл.* (*объединяет отдельные члены в перечислении*) да/дә, һәм; **и я, и он, и все мы вме́сте** мин дә, ул да һәм беҙ бөтәбеҙ ҙә бергә

**5.** *усил.* (*употребляется для усиления выразительности в начале предложений*) да/дә, хатта; **и рабо́тал же он так, что забыва́л всё на све́те** хатта бөтә донъяһын онотоп эшләй торғайны

**6.** *уступ.* (*употребляется в значении, близком к союзу "хотя"*) да/дә; **я и рабо́тал, да де́нег не хвата́ло** эшләһәм дә, аҡса етешмәне

**И II** *частица усил.* (*употребляется для усиления значения слова, перед которым стоит*) да/дә, хатта; **не могу́ и ду́мать об э́том** был турала уйлай ҙа алмайым

**И III** *межд.* э-э-эй, ҡуй, йә; **и-и-и, когда́ э́то бу́дет** э-э-эй, ҡасан була әле ул

**И́БИС** *м* ибис (*ҡош*)

**И́БИСОВЫЙ,** -ая, -ое ибис ...ы; **и́бисовое яйцо́** ибис йомортҡаһы

**И́БО** *союз*; *книжн.* сөнки, -ға/-гә күрә, -лыҡтан/-лектән; **мы победи́ли, и́бо на́ше де́ло пра́вое** эшебеҙ ғәҙел булғанға күрә, беҙ еңдек

**И́ВА** *ж* тал; **ло́мкая и́ва** мурт тал; **плаку́чая и́ва** бөҙрә тал

**ИВА́Н-ДА-МА́РЬЯ** *ж* ала миләүшә

**ИВА́НОВСКИЙ: (крича́ть) во всю ива́новскую** ер йыртып, бөтә көскә ҡысҡырыу, һөрән һалыу, бар көсөнә

**ИВАСЁВЫЙ,** -ая, -ое иваси ...ы; **ивасёвая икра́** иваси ыуылдырығы; **ивасёвый лов** иваси тотоу

**ИВАСИ́** *ж нескл.* иваси (*балыҡ*)

**ИВНЯ́К** *м* **1.** таллыҡ; **во́зле реки́ ивня́к** йылға буйында таллыҡ **2.** *собир.* (*прутья ивы*) тал сыбыҡтары

**И́ВОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тал ...ы; **и́вовая кора́** тал ҡабығы; **и́вовый куст** тал ҡыуағы; **и́вовые ли́стья** тал япраҡтары **2.** тал, талдан; **и́вовая корзи́нка** тал кәрзинкә; **и́вовый плете́нь** тал ситән

**И́ВОЛГА** *ж* һарығош, үтәбикә

**ИВРИ́Т** *м* иврит (*боронғо йәһүд теленең хәҙерге модификацияһы, Израилдең рәсми теле*)

**ИГЛА́** *ж*; *в разн. знач.* энә; **маши́нная игла́** машина энәһе; **шве́йная игла́** теген энәһе; **патефо́нная игла́** патефон энәһе; **и́глы сосны́** ҡарағай энәләре; **игла́ шипо́вника** гөлйемеш энәһе; **и́глы ежа́** терпе энәләре

**ИГЛА́-РЫ́БА** *ж* энәбалыҡ, орсоҡбалыҡ

**ИГЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое энәле; **игли́стый ка́ктус** энәле кактус

**ИГЛОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое энә һымаҡ; **иглови́дные ли́стья** энә һымаҡ япраҡтар; **иглови́дный камы́ш** энә һымаҡ ҡамыш

**ИГЛОДЕРЖА́ТЕЛЬ** *м* энә тотҡос (ҡуйғыс); **иглодержа́тель патефо́на** патефондың энә тотҡосо

**ИГЛОКО́ЖИЕ** *мн.*; *зоол.* энә тиреләләр (*диңгеҙ терпеләре һ.б.*)

**ИГЛООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое энә һымаҡ, энәгә оҡшаған; **иглообра́зные семена́ ковыля́** ҡылғандың энәгә оҡшаған орлоҡтары

**ИГЛОТЕРАПИ́Я** *ж* энә терапияһы (*энә ҡаҙап дауалау ысулы*)

**ИГЛОУКА́ЛЫВАНИЕ** *с* энәләр ҡаҙап дауалау

**ИГНОРИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* иғтибарһыҙ ҡалдырыу, әһәмиәт бирмәү, иҫәпләшмәү, һанға һуҡмау

**И́ГО** *с* иҙеү, ҡыҫыу; **колониа́льное и́го** колониаль иҙеү

**ИГО́ЛКА** *ж см.* **игла́** ♦ **(сиде́ть) как на иго́лках** энә өҫтөндә ултырған һымаҡ ултырыу, борсолоп ултырыу

**ИГО́ЛОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **иго́лка** ♦ **(оде́т) с иго́лочки** өр-яңынан, ҡупшы итеп (кейенгән) (*энәнән-ептән генә сыҡҡан кейем*)

**ИГО́ЛЬНИК** *м* энә сәнскес, энә һауыты; **воткну́ть иго́лку в иго́льник** энә сәнскескә энәне ҡаҙап ҡуйыу

**ИГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое энә ...ы; **иго́льное ушко́** энә күҙе

**ИГО́ЛЬЧАТЫЙ,** -ая, -ое энәле, энәләрҙән торған; **иго́льчатый бараба́н** энәле барабан (*машинкала*)

**ИГО́РНЫЙ,** -ая, -ое ҡомарлы уйындар ...ы; **иго́рный дом** ҡомарлы уйындар йорто

**ИГРА́** *ж* **1.** *см.* **игра́ть**; **игра́ в ку́клы** ҡурсаҡ уйнау; **игра́ в футбо́л** футбол уйнау; **игра́ в ша́хматы** шахмат уйнау; **игра́ на скри́пке** скрипкала уйнау; **виртуо́зная игра́** үтә (ныҡ) оҫта уй-

нау; **меня́ потрясла́ игра́ э́того арти́ста** был артистың уйнауы мине хайран ҡалдырҙы **2.** (*заня́тие*) уйын; **вое́нная игра́** һуғыш уйыны; **де́тские и́гры** балалар уйыны; **спорти́вные и́гры** спорт уйындары **3.** (*быстрая смена красок*) **игра́ ма́рева** монар уйнау ♦ **игра́ воображе́ния** буш хыял, уйҙырма, фантазия; **игра́ приро́ды** тәбиғәттәге ғәҙәттән тыш хәл; **игра́ слов** һүҙ уйнатыу (*һүҙҙәрҙең бер мәғәнәһен икенсеһе урынына ҡулланыу*); **игра́ с огнём** ут менән уйнау; **биржева́я игра́** биржа уйыны (*ҡиммәтле ҡағыҙҙар менән һатыу итеү*); **раскры́ть игру́** *чью* йәшертен уйҙы асыу (*мутлыҡтарҙы өҫкә сығарыу*)

**ИГРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уйын ...ы; **игра́льные ка́рты** уйын кәрттәре

**ИГРА́ТЬ** *несов.*; *в разн. знач.* уйнау; **игра́ть в футбо́л** футбол уйнау; **ве́тер игра́ет** ел уйнай; **де́ти игра́ли в саду́** балалар баҡсала уйнай ине; **ры́ба игра́ет в воде́** һыуҙа балыҡ уйнай; **игра́ть в ша́хматы** шахмат уйнау; **игра́ть на бильярде** бильярд уйнау; **игра́ть на кура́е** ҡурай уйнау; **игра́ть на роя́ле** роялдә уйнау; **со́лнце игра́ет на пове́рхности воды́** һыу өҫтөндә ҡояш уйнай; **игра́ть роль Салава́та** Салауат ролен уйнау; **она́ хорошо́ игра́ет ро́ли стару́х** ул ҡарсыҡтар ролен яҡшы уйнай ♦ **игра́ть в великоду́шие** киң күңелле булып ҡыланыу; **игра́ть глаза́ми** күҙ уйнатыу; **игра́ть коме́дию** алдау, хәйләләү; **игра́ть слова́ми** һүҙ уйнатыу; **игра́ть с огнём** ут менән шаярыу

**ИГРА́ЮЧИ** *нареч.*; *разг.* уйнап ҡына, көс һалмай, анһат ҡына; **игра́ючи реши́ть тру́дную зада́чу** ауыр мәсьәләне анһат ҡына сисеү

**ИГРА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **игра́ть** **2.** *в знач. сущ.* **игра́ющий** *м* и **игра́ющая** *ж* уйнаусы, уйынсы

**И́ГРЕК** *м* игрек (**1.** *латин алфавитында егерме бишенсе хәреф исеме* **2.** *мат. шул хәреф менән билдәләнгән билдәһеҙ дәүмәл*); **зада́ча с и́ксом и и́греком** икс, игрек менән мәсьәлә

**ИГРЕ́НЕВЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) саптар (*ялы-ҡойроғо сал булған ерән*); **игре́невый жеребе́ц** саптар айғыр

**ИГРИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** уйынсаҡ, уйынсыл, шуҡ, шаян; **игри́вый ребёнок** шуҡ бала **2.** тыйнаҡһыҙ, әҙәпһеҙ; **игри́вый жест** әҙәпһеҙ ишара

**ИГРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое бызырлап торған; **игри́стый напи́ток** бызырлап торған эсемлек

**И́ГРИЩЕ** *с* уйын (*йәштәрҙең бергә йыйылып, бейеү һәм күңел асыу уйындары*)

**ИГРОВО́Й,** -ая, -ое уйын ...ы; **игрова́я площа́дка** уйын майҙансығы

**ИГРО́К** *м* уйынсы; **игроки́ футбо́льной кома́нды** футбол командаһы уйынсылары; **аза́ртный игро́к** ҡомарлы уйынсы

**ИГРУ́Н** *м* и **ИГРУ́НЬЯ** ж; *разг.* уйынсаҡ, шаян, шуҡ; **котёнок-игру́н** шуҡ бесәй балаһы

**ИГРУ́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уйынсыҡ(тар) ...ы; **игру́шечный магази́н** уйынсыҡтар магазины **2.** уйынсыҡ; **игру́шечная лоша́дка** уйынсыҡ ат; **игру́шечный парово́з** уйынсыҡ паровоз

**ИГРУ́ШКА** *ж* уйынсыҡ, тәтәй; **де́тские игру́шки** балалар уйынсыҡтары; **мя́гкая игру́шка** йомшаҡ уйынсыҡ; **прода́жа игру́шек** уйынсыҡтар һатыу; **купи́ть игру́шку** тәтәй һатып алыу ♦ **быть игру́шкой в рука́х** *чьих-л.* берәй кешенең ҡулында уйынсыҡ булыу; **как (сло́вно) игру́шка** уйынсыҡ кеүек, матур

**ИГУ́МЕН** *м* игумен (*ирҙәр монастыры башлығы*); **игу́менья** *ж* игуменья (*ҡатын-ҡыҙҙар монастыры башлығы*)

**ИГУ́МЕНСКИЙ,** -ая, -ое игумен ...ы; **игу́менская ке́лья** игумен хөжрәһе

**ИДА́ЛЬГО** *м нескл.* идальго (*урта быуаттарҙа Испания дворяны*)

**ИДЕА́Л** *м* **1.** идеал, бөйөк маҡсат; **возвы́шенные идеа́лы** бөйөк идеалдар; **све́тлый идеа́л** яҡты идеал **2.** иң камил өлгө, иң юғары дәрәжә; **идеа́л красоты́** матурлыҡтың иң юғары өлгөһө

**ИДЕАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **идеализи́ровать**; **идеализа́ция старины́** боронғоно идеаллаштырыу

**ИДЕАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* идеаллаштырыу, ысынбарлыҡтан ситләшеү; **идеализи́ровать же́нщин** ҡатын-ҡыҙҙарҙы идеаллаштырыу

**ИДЕАЛИЗИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **идеализи́ровать**

**ИДЕАЛИ́ЗМ** *м* **1.** *филос.* идеализм; **объекти́вный идеали́зм** объектив идеализм; **субъекти́вный идеали́зм** субъектив идеализм **2.** ысынбарлыҡты идеаллаштырыу

**ИДЕАЛИ́СТ** *м* **1.** *филос.* идеалист (*идеализм яҡлы*); **быть идеали́стом** идеалист булыу **2.** (*мечтатель*) идеалист, хыялый

**ИДЕАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ** и **ИДЕАЛИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое идеалистик; **идеалисти́ческое мировоззре́ние** донъяға идеалистик ҡараш; **идеалисти́ческая филосо́фия** идеалистик фәлсәфә

**ИДЕА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** идеаль, һоҡландырғыс; **идеа́льная любо́вь** һоҡландырғыс мөхәббәт **2.** бик яҡшы, (һәйбәт) өлгөлө, бик, идеаль; **идеа́льная чистота́** өлгөлө таҙалыҡ; **идеа́льные усло́вия** идеаль шарттар

**ИДЕ́ЙНО-ВОСПИТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое идея-тәрбиә ...ы; **иде́йно-воспита́тельная рабо́та** идея-тәрбиә эше

**ИДЕ́ЙНО-ПОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое идея-сәйәси; **иде́йно-полити́ческое еди́нство** идея-сәйәси берҙәмлек

**ИДЕ́ЙНОСТЬ** *ж* идеялылыҡ; **высо́кая иде́йность** юғары идеялылыҡ; **иде́йность произведе́ния** әҫәрҙең идеялылығы

**ИДЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*выражающий основную мысль*) идея ...ы; **иде́йное содержа́ние расска́за** хикәйәнең идея йөкмәткеһе **2.** (*проникну-*

*тый передовыми идеями*) идеялы; **иде́йное иску́сство** идеялы сәнғәт; **иде́йный челове́к** идеялы кеше **3.** (*идеологический*) идея яғынан, идея ...ы; **иде́йное воспита́ние** идея тәрбиәһе

**ИДЕНТИФИКА́ЦИЯ** *ж см.* **идентифици́ровать**

**ИДЕНТИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; книжн.* тиңләштереү, берҙәй тип таныу

**ИДЕНТИФИЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.; книжн.* тиңләшеү, тура килеү **2.** *только несов. страд. от* **идентифици́ровать**

**ИДЕНТИ́ЧНОСТЬ** *ж; книжн.* оҡшашлыҡ, берҙәйлек; **иденти́чность мне́ний** фекерҙәр оҡшашлығы

**ИДЕНТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* берҙәй, оҡшаш; **иденти́чный текст** оҡшаш текст

**ИДЕОГРА́ММА** *ж; лингв.* идеограмма (*шартлы рәүештә бер төшөнсәне аңлатҡан яҙыу билдәһе*)

**ИДЕОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* идеографик; **идеографи́ческое письмо́** идеографик яҙыу

**ИДЕОГРА́ФИЯ** *ж; лингв.* идеография (*идеограммалар менән яҙыу*)

**ИДЕО́ЛОГ** *м* идеолог; **идео́логи револю́ции** инҡилап идеологтары

**ИДЕОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** идеология ...ы; **идеологи́ческая рабо́та** идеология эше; **идеологи́ческие вопро́сы** идеология мәсьәләләре **2.** идеологик; **идеологи́ческая борьба́** идеологик көрәш; **идеологи́ческая диве́рсия** идеологик диверсия

**ИДЕ́Я** *ж; в разн. знач.* идея, (төп) фекер, уйфекер; **демократи́ческие иде́и** демократик идеялар; **передовы́е иде́и** алдынғы идеялар; **полити́ческие иде́и** сәйәси идеялар; **иде́я рома́на** романдың төп фекере; **иде́я карти́ны** картинаның төп фекере

**ИДИЛЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *лит.* идиллия ...ы; **идилли́ческий жанр** идиллия жанры **2.** *перен.* идиллик, тыныс, ғауғаһыҙ; **идилли́ческое настрое́ние** идиллик кәйеф

**ИДИ́ЛЛИЯ** *ж* идиллия (**1.** *әҙ. тәбиғәт ҡосағында ауыл кешеләренең тормошон идеаллаштырып һүрәтләгән шиғри әҫәр* **2.** *кцсм. тыныс, вайымһыҙ йәшәү*)

**ИДИО́МА** *ж; лингв.* идиома (*һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә тура килмәгән һүҙбәйләнеш, мәҫ., үҙәк өҙөлөү, ҡолаҡ ҡағыу һ.б.*)

**ИДИОМА́ТИКА** *ж; лингв.* идиоматика (**1.** *лексикологияның идиомалар тураһындағы бүлеге* **2.** *телдә идиомалар йыйылмаһы*)

**ИДИОМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* идиоматик; **идиомати́ческое выраже́ние** идиоматик әйтем

**ИДИО́Т** *м* **1.** *мед.* идиот, аҡылға зәғиф кеше **2.** *прост., бран.* алйот, ахмаҡ, йүләр, тинтәк

**ИДИОТИ́ЗМ** *м* **1.** *мед.* идиотизм (*зәғифлек, ғәриплек, иҫәрлек*) **2.** *разг.* алйотлоҡ, ахмаҡлыҡ, йүләрлек, тинтәклек

**ИДИО́ТСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** идиоттарса **2.** ахмаҡ, мәғәнәһеҙ; **идио́тский посту́пок** ахмаҡ ҡылыҡ

**ИДИО́ТСТВО** *с; разг.* ахмаҡлыҡ, идиоттарса ҡыланыш

**И́ДИШ** *м* иҙиш (*Европала, Америкала, Көньяҡ Африкала һәм Израилдә йәшәгән йәһүдтәр теле*)

**И́ДОЛ** *м* **1.** бот, һынташ, тораташ; **поклоне́ние и́долам** боттарға табыныу **2.** *перен.* (*предмет поклонения*) кемдер табынған кеше, әйбер

**ИДОЛОПОКЛО́ННИК** *м* ботҡа (һынташҡа) табыныусы

**ИДОЛОПОКЛО́НСТВО** *с* ботҡа (һынташҡа) табыныу

**ИДТИ́** *несов.* **1.** (*туда, от нас*) барыу, китеү; (*сюда, к нам*) килеү; (*возвращаться*) ҡайтыу; **идти́ на рабо́ту** эшкә барыу; **идти́ в го́сти** ҡунаҡҡа барыу; **по́езд идёт в пять часо́в** поезд сәғәт биштә китә; **кто идёт?** кем килә?; **иду́ домо́й** өйгә ҡайтам **2.** *перен.* (*поступать куда-л., приступать к чему-л.*) барыу, инеү, китеү; **идти́ в вое́нное учи́лище** хәрби училищеға барыу; **он идёт в университе́т** ул университетҡа бара; **идти́ учи́ться** уҡырға китеү; **идти́ доброво́льцем** үҙе теләп китеү **3.** *перен.* (*двигаться, развиваться в каком-л. направлении*) барыу; **идти́ к лу́чшему** яҡшылыҡҡа барыу **4.** (*распространяться*) сығыу, килеү, аңҡыу; **из трубы́ идёт дым** мөрйәнән төтөн сыға **5.** (*течь, выделяться*) килеү, ағыу; **из ра́ны идёт кровь** яранан ҡан килә; **вода́ идёт по ка́пле** һыу тамсылап ҡына аға **6.** *разг.* (*находить сбыт*) үтеү; **э́тот това́р хорошо́ идёт** был тауар яҡшы үтә **7.** (*пролегать, простираться*) үтеү; **доро́га идёт ле́сом** юл урман аша үтә **8.** (*действовать — о механизмах*) йөрөү, эшләү; **часы́ иду́т хорошо́** сәғәт дөрөҫ йөрөй **9.** (*лить, падать — об осадках*) яуыу; **идёт дождь** ямғыр яуа; **идёт мо́крый снег** епшек ҡар яуа **10.** (*протекать, проходить*) үтеү; **вре́мя идёт бы́стро** ваҡыт тиҙ үтә **11.** (*происходить, совершаться*) барыу; **экза́мены иду́т** имтихандар бара **12.** (*проявлять готовность*) күнеү, ризалашыу; **идти́ на компроми́сс** компромисҡа килеү (ризалашыу); **идти́ на ги́бель** үлемгә барыу **13.** *во что, на что, подо что* (*предназначаться, употребляться для чего-л.*) барыу, китеү; **на пла́тье идёт три ме́тра шёлка** күлдәккә өс метр ебәк китә; **идти́ на расто́пку** яғыуға китеү; **идти́ на э́кспорт** экспортҡа китеү **14.** *кому-чему, к кому-чему* (*подходить, соответствовать*) килешеү, барыу; **эта́ шля́па ей идёт** был эшләпә уға килешә **15.** (*входить, влезать*) һыйыу, барыу; **гвоздь не идёт в стену́** стенаға сөй бармай **16.** (*делать ход в игре*) йөрөү;

**идти́ конём** *шахм.* ат менән йөрөү **17.** *перен.* (*надвигаться, наступать*) килеү; **весна́ идёт** яҙ килә **18.** *перен.* (*поступать, выдаваться регулярно*) килеү, килеп тороу; **иду́т проце́нты** проценты килеп тора ♦ **идти́ в го́ру** алға барыу, күтәрелеү (*эш-хәлгә ҡарата*); **идти́ впрок** файҙаға китеү; **идти́ ко дну**: 1) батыу; 2) *перен.* юҡҡа сығыу; **идти́ за́муж** кейәүгә сығыу; **идти́ на всё** бөтә нәмәгә барыу; **идти́ свои́м хо́дом** үҙ юлы менән китеү; **идти́ свои́м чередо́м** үҙ яйы менән барыу; **из головы́ (из ума́) не идти́** баштан сыҡмау; **в го́лову (на у́м) не идёт** башҡа килмәй; **голова́ идёт кру́гом** баш ҡата (ҡатып бөтә, әйләнеп бөтә)

**ИЕЗУИ́Т** *м* **1.** иезуит (*католиктар монахы*) **2.** *перен.* ике йөҙлө кеше, хәйләкәр кеше

**ИЕЗУИ́ТСКИЙ,** -ая, -ое **1.** иезуит ...ы; **иезуи́тское о́бщество** иезуиттар йәмғиәте **2.** *перен.* ике йөҙлө, хәйләкәр; **иезуи́тский посту́пок** ике йөҙлө ҡыланыш

**ИЕЗУИ́ТСТВО** *с* иезуитлыҡ, хәйләкәрлек

**ИЕ́НА** *ж* иена (*Япония аҡса берәмеге*)

**ИЕРА́РХ** *м* иерарх (*епископ дәрәжәһендәге рухани*)

**ИЕРАРХИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое иерархия ...ы; **иерархи́ческая ле́стница** иерархия баҫҡысы

**ИЕРА́РХИЯ** *ж* иерархия (*түбән чиндарҙың юғары чиндарға буйһоноу тәртибе*); **слу-же́бная иера́рхия** хеҙмәт иерархияһы

**ИЕРО́ГЛИФ** *м* иероглиф (**1.** *яҙыуҙа тулы бер төшөнсәне, айырым ижекте йәки өндө белдерелгән һүрәт билдәһе* **2.** *танымаҫлыҡ яҙыу*)

**ИЕРОГЛИФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое иероглиф ...ы; **иероглифи́ческое письмо́** иероглиф яҙыуы; **иероглифи́ческий знак** иероглиф билдәһе

**ИЖДИВЕ́НЕЦ** *м* и **ИЖДИВЕНКА** *ж* кемдеңдер тәрбиәһендәге (ҡарамағындағы) кеше, баҡма; **у него́ пять челове́к иждиве́нцев** уның тәрбиәһендә биш кеше, уның ҡарамағында биш баҡма бар

**ИЖДИВЕ́НИЕ** *с* тәрбиә, ҡарамаҡ; **быть на иждиве́нии бра́та** ағай тәрбиәһендә булыу; **взять на иждиве́ние** ҡарамаҡҡа алыу

**ИЖДИВЕ́НСТВО** *с* кеше тәрбиәһендә тороу, баҡмасылыҡ

**ИЖДИВЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тәрбиәләге (ҡарамағындағы) кеше ...ы, кеше тәрбиәһендә (ҡарамағында) тороу ...ы; **иждиве́нческий фонд** баҡмасылыҡ фонды; **иждиве́нческие настрое́ния** кеше елкәһендә генә тороу уйҙары

**ИЗ** и **ИЗО** *предлог с род. п.* **1.** (*при обозначении предмета, места, откуда направлено действие, или исходного материала*) -ҙан/-ҙән; **прие́хали из Москвы́** Мәскәүҙән килделәр; **привезти́ из дере́вни** ауылдан килтереү; **вы́йти из до́ма** өйҙән сығыу; **вы́йти из головы́** баштан сығыу; **доста́ть из карма́на** кеҫәнән алыу; **река́ вы́шла из берего́в** йылға ярҙарынан сыҡҡан; **он из Ли́твы** ул Литванан; **узна́ть из газе́т** гәзиттән белеү; **сде́лал из де́рева** ағастан эшләгән

**2.** (*при обозначении части целого*) -дың/-деӊ; **одно́ из двух** икенең бере

**3.** (*при определении чего-л. сложного путём указания на составляющие единичные предметы*) -дан/-дән торған; **коллекти́в из двадцати́ челове́к** егерме кешенән торған коллектив

**4.** (*при указании причины, основания, цели*) -лыҡтан/-лектән, йөҙөнән, сығып, ҡарап; **из уваже́ния к вам** ихтирам иткәнлектән; **из при́нципа** принциптан сығып ♦ **из го́да в год** йылдан-йыл, йыл һайын; **из рук в ру́ки** ҡулдан ҡулға

**ИЗ...** (**изо...**, **изъ...**, **ис...**) *приставка* (*ҡылым яһағанда ҡулланылып, түбәндәге мәғәнәләрҙе белдерә*: 1) *хәрәкәттең эстән тышҡа йүнәлешен, мәҫ.*, **извле́чь** алыу, тартып сығарыу; **изгна́ть** ҡыуып сығарыу; 2) *эш-хәрәкәттең бөтөн предметҡа йәйелеүен, мәҫ.*, **изра́нить** йәрәхәтләп бөтөү; **изре́зать** ҡырҡып бөтөү; 3) *эш-хәрәкәттең һуңғы сиккә етеүен, мәҫ.*, **изму́чить** интектереп, ғазаплап бөтөү; 4) *берәй нәмәне эш процесында тотоноп бөтөрөүҙе, сарыф итеүҙе, мәҫ.*, **израсхо́довать** тотоноп бөтөү)

**ИЗБА́** *ж* ағас өй, өй, йорт

**ИЗБАВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ИЗБАВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ҡотҡарыусы, һаҡлап алып ҡалыусы

**ИЗБА́ВИТЬ** *сов. кого-что* ҡотолдороу, ҡотҡарыу, алып ҡалыу, йолоу; **изба́вить от сме́рти** үлемдән ҡотҡарыу

**ИЗБА́ВИТЬСЯ** *сов. от кого-чего* ҡотолоу, йолоноу, арыныу; **изба́виться от опа́сности** ҡурҡыныстан ҡотолоу; **изба́виться от боле́зни** ауырыуҙан ҡотолоу; **изба́виться от хлопо́т** мәшәҡәттән ҡотолоу; **изба́виться от го́ря** ҡайғынан арыныу

**ИЗБАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **изба́вить**, **изба́виться**

**ИЗБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **изба́вить**

**ИЗБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изба́виться** **2.** *страд. от* **избавля́ть**

**ИЗБАЛО́ВАННОСТЬ** *ж* иркәлек, иркәләп боҙоу; **избало́ванность ребёнка** баланың иркәлеге

**ИЗБАЛО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **избалова́ть** **2.** *прил.* иркә, иркәләп боҙолған, артыҡ иркәләнгән; **избало́ванная де́вочка** иркә ҡыҙыҡай

**ИЗБАЛОВА́ТЬ** *сов. кого* иркәләп (иркәләтеп) боҙоу, шаштырыу, осондороу; **ребёнка избалова́ли роди́тели** баланы ата-әсәләре осондорған

**ИЗБАЛОВА́ТЬСЯ** *сов.* иркәләнеп боҙолоу, шашыныу, осоноу; **он соверше́нно избалова́лся** ул бөтөнләй иркәләнеп боҙолған

**ИЗБАЛО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **избалова́ть**

**ИЗБАЛО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **избалова́ться** **2.** *страд. от* **избало́вывать**

**ИЗБА́-ЧИТА́ЛЬНЯ** *ж* уҡыу өйө

**ИЗБЕ́ГАТЬ** *сов. что*; *разг.* йөрөп (йүгереп) сығыу, күп ерҙә булыу; **избе́гать весь го́род** ҡаланы йөрөп сығыу

**ИЗБЕГА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-чего* (*сторониться, уклоняться*) ҡасыу, күренмәҫкә тырышыу; **избега́ть знако́мых** таныштарҙан ҡасыу; **я избега́ю встре́чи с ним** мин уның менән осрашыуҙан ҡасам **2.** (*спасаться, отделываться*) ҡасыу, һаҡланып ҡалыу, ҡотолоу; **избега́ть опа́сности** хәүеф-хәтәрҙән ҡасыу

**ИЗБЕ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*устать от беготни*) йүгереп арыу, йүгереп хәлдән тайыу

**ИЗБЕ́ГНУТЬ** *сов. см.* **избега́ть**

**ИЗБЕЖА́НИЕ: во избежа́ние** *чего нимәлер* булмаһын тип, килеп сыҡмаһын тип; **во избежа́ние оши́бок** хаталар булмаһын тип; **во избежа́ние неприя́тностей** күңелһеҙлектәр килеп сыҡмаһын тип

**ИЗБЕЖА́ТЬ** *сов. см.* **избега́ть**

**ИЗБИВА́ТЬ** *несов. см.* **изби́ть**

**ИЗБИЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изби́ть** 1; **2.** (*массовое убийство*) үлтереү, ҡырыу, ҡырып бөтөрөү ♦ **избие́ние младе́нцев** *шутл.* бала-сағаны интектереү (*йәш, тәжрибәһеҙ кешеләргә бик ҡаты талаптар ҡуйғанда шаяртып әйтелә*)

**ИЗБИРА́ТЕЛЬ** *м* и **ИЗБИРА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* һайлаусы; **собра́ние избира́телей** һайлаусылар йыйылышы; **встре́ча с избира́телями** һайлаусылар менән осрашыу

**ИЗБИРА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һайлау ...ы; **избира́тельная систе́ма** һайлау системаһы; **избира́тельное пра́во** һайлау хоҡуғы; **избира́тельный уча́сток** һайлау участкаһы

**ИЗБИРА́ТЬ** *несов. см.* **избра́ть**

**ИЗБИ́ТОСТЬ** *ж* күп ҡабатланыу, иҫкереү; **изби́тость те́мы** теманың күп ҡабатланыуы

**ИЗБИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изби́ть** **2.** *прил.* тапалған, күп сәйнәлгән (һөйләнелгән), иҫкергән; **изби́тая те́ма** күп сәйнәлгән тема; **изби́тый сюже́т** иҫкергән сюжет

**ИЗБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* туҡмау, туҡмап ташлау; **изби́ть до́ сме́рти** үлтергәнсе туҡмау; **изби́ть до кро́ви** ҡанға батырғансы туҡмап ташлау **2.** *что* (*привести в негодное состояние*) иҙеү, эштән сығарыу; **изби́ть доро́гу колёсами** тәгәрмәс менән юлды эштән сығарыу

**ИЗБОРОЗДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бураҙналап (йырғылап) бөтөрөү; **плуги́ избороздили зе́млю** һабандар ерҙе бураҙналап бөтөргән; **овра́ги избороздили всё по́ле** йырғанаҡтар баҫыуҙы йырғылап бөтөргән **2.** йыйырсыҡлау, йыйырсыҡланып бөтөү, йыйырсыҡландырыу, һыр менән ҡапланыу; **морщи́ны избороздили лоб** маңлай һырҙар менән ҡапланған **3.** *перен.* йөрөп сығыу, арҡырыһын-буйын буйлау; **изборозди́ть моря́ и океа́ны** диңгеҙ һәм океандарҙы йөрөп сығыу

**ИЗБОЧЕ́НИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бөйөргә таяныу

**ИЗБРА́НИЕ** *с см.* **избра́ть**

**ИЗБРА́ННИК** *м* **1.** һайланған (һайлап ҡуйылған) кеше; **избра́нник наро́да** халыҡ тарафынан һайланған кеше **2.** һөйөклө (күңел тартҡан) ир-ат

**ИЗБРА́ННИЦА** *ж* **1.** һайланған (һайлап ҡуйылған) ҡатын-ҡыҙ **2.** һөйөклө (күңел тартҡан) ҡатын-ҡыҙ

**И́ЗБРАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **избра́ть** **2.** *прил.* һайланма, һайлап алынған; **и́збранное произведе́ние** һайланма әҫәр **3.** *в знач. сущ.* **и́збранные** *мн.* һайлап алынғандар, айырым хоҡуҡ менән файҙаланған (привилегиялы) кешеләр; **для и́збранных** айырым хоҡуҡ менән файҙаланған кешеләр өсөн

**ИЗБРА́ТЬ** *сов. кого-что* һайлау; **избра́ть депута́том** депутат итеп һайлау; **избра́ть в коми́ссию** комиссияға һайлау; **избра́ть специа́льность** һөнәр һайлау

**ИЗБЫ́ТОК** *м* **1.** (*излишек*) артыҡ, (кәрәгенән) артҡаны, артып ҡалған; **избы́ток хле́ба** икмәктең артҡаны **2.** (*обилие*) муллыҡ, артыҡлыҡ; **от избы́тка чувств** артыҡ тойғоларҙан ♦ **в избы́тке** муллыҡта

**ИЗБЫ́ТОЧНОСТЬ** *ж* артыҡлыҡ, муллыҡ; **избы́точность вла́ги в по́чве** тупраҡта дымдың артыҡлығы

**ИЗБЫ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое мул, (кәрәгенән) артыҡ; **избы́точное увлажне́ние** артыҡ еүешлек; **избы́точные това́ры** кәрәгенән артыҡ тауар

**ИЗВАЛЯ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* аунатыу, аунатып бөтөрөү; **изваля́ть в снегу́** ҡарҙа аунатыу

**ИЗВАЛЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аунау; **изваля́ться в пыли́** туҙанда аунау

**ИЗВАЯ́НИЕ** *с* һын; **дре́внее извая́ние** боронғо һын; **стои́т как извая́ние** һын кеүек ҡатып тора

**ИЗВАЯ́ТЬ** *сов. кого-что* юнып (ҡырып, әүәләп) яһау (*һынды, һүрәтте*)

**ИЗВЕ́ДАТЬ** *сов. что* белеү, татыу, кисереү; **изве́дать го́ре** ҡайғы кисереү

**И́ЗВЕРГ** *м* сиктән тыш яуыз, ҡанһыҙ, йыртҡыс; **фаши́стские и́зверги** фашист йыртҡыстары

**ИЗВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **изве́ргнуть**

**ИЗВЕРГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изве́ргнуться** **2.** *страд. от* **изверга́ть**

**ИЗВЕ́РГНУТЬ** *сов. что* атыу, атып сығарыу, урғытыу; **вулка́н изве́рг пото́ки ла́вы** вулкан лава ағымын урғытты

**ИЗВЕ́РГНУТЬСЯ** *сов.* урғылыу, атылыу, атылып сығыу

**ИЗВЕРЖЕ́НИЕ** *с см.* **изверга́ть**; **изверже́ние вулка́на** вулкан атылыу

**ИЗВЕ́РИТЬСЯ** *сов. в ком-чём* тамам өмөт өҙөү, ышанмау, ышаныс юғалтыу, төңөлөү; **изве́риться в свои́х си́лах** үҙ көсөңә ышанмау

**ИЗВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кинәт боролоу (ялтаныу), тайпылыу, тайшаныу **2.** *перен., разг.* ҡотолоу, ситләшеү, ысҡыныу, ҡасыу

**ИЗВЕСТИ́** *сов.* **1.** *что; разг.* (*истратить*) тотоп бөтөрөү, сарыф итеү, тотоноу, тотоноп бөтөү; **извести́ мно́го де́нег** күп аҡса бөтөрөү **2.** *кого-что* (*истребить*) бөтөрөү, ҡырыу, юҡҡа сығарыу; **извести́ леса́** урмандарҙы бөтөрөү; **извести́ тарака́нов** тараҡандарҙы ҡырыу **3.** *кого; разг.* (*измучить*) интектереү, йөҙәтеү, ғазаплау, яфалау, бөгөү, борсоу; **го́ре совсе́м извело́** ҡайғы бөтөнләй бөктө

**ИЗВЕ́СТИЕ** *с* **1.** хәбәр, белдереү; **после́дние изве́стия** һуңғы хәбәрҙәр; **печа́тать изве́стия** яңылыҡтар (хәбәрҙәр) баҫыу; **ло́жные изве́стия** ялған хәбәрҙәр **2.** *только мн.* **изве́стия** хәбәрҙәр; **“Изве́стия Российской акаде́мии нау́к”** “Рәсәй фәндәр академияһының хәбәрҙәре”

**ИЗВЕСТИ́СЬ** *сов.; разг.* йонсоу, интегеү, интегеп бөтөү, эштән сығыу; **извести́сь от го́ря** ҡайғынан йонсоу; **извести́сь от бессо́нницы** йоҡоһоҙлоҡтан интегеү

**ИЗВЕСТИ́ТЬ** *сов. кого-что, о чём* хәбәр итеү, белдереү; **извести́ть о дне заседа́ния** ултырыштың көнөн хәбәр итеү; **извести́ть о прие́зде** килеү тураһында хәбәр итеү

**ИЗВЁСТКА** *ж; разг. см.* **и́звесть**

**ИЗВЕСТКОВА́ТЬ** *сов., несов. что; спец.* эзбизләү, (тупраҡҡа) эзбиз индереү

**ИЗВЕСТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** эзбиз ...ы; **известко́вые поро́ды** эзбиз тоҡомдары **2.** эзбизле; **известко́вые удобре́ния** эзбизле ашламалар; **известко́вая вода́** эзбизле һыу (*татырлы, ҡаты һыу*)

**ИЗВЕ́СТНО** **1.** *кому в знач. сказ., безл.* билдәле, мәғлүм; **всем изве́стно** барыһына ла билдәле (мәғлүм) **2.** *в знач. вводн. сл.; прост.* билдәле, әлбиттә ♦ **как изве́стно** билдәле (мәғлүм) булыуынса

**ИЗВЕ́СТНОСТЬ** *ж* дан, шөһрәт, танылыу; **пользова́ться изве́стностью** шөһрәтле булыу, танылыу; **получи́ть изве́стность** шөһрәт (дан) ҡаҙаныу

**ИЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*знакомый*) билдәле, таныш; **изве́стное всем собы́тие** бөтә кешегә билдәле ваҡиға **2.** (*знаменитый*) атаҡлы, билдәле, күренекле, танылған, мәшһүр; **изве́стный писа́тель** танылған яҙыусы; **изве́стный челове́к** билдәле кеше **3.** (*определённый*) билдәле бер; **в изве́стный моме́нт** билдәле бер ваҡытта **4.** (*некоторый, подразумеваемый*) ҡайһы бер; **в изве́стных слу́чаях** ҡайһы бер осраҡтарҙа

**ИЗВЕСТНЯ́К** *м* эзбизташ, бурташ; **слой известняка́** эзбизташ ҡатламы

**ИЗВЕСТНЯКО́ВЫЙ,** -ая, -ое эзбизташ ...ы; **известняко́вые за́лежи** эзбизташ ятҡылыҡтары

**И́ЗВЕСТЬ** *ж* эзбиз; **гашёная и́звесть** һүндерелгән эзбиз; **строи́тельная и́звесть** төҙөлөш эзбизе; **хло́рная и́звесть** хлорлы эзбиз; **побели́ть и́звестью** эзбиз менән ағартыу

**ИЗВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое боронғо, бик иҫке, бик күптәнге, электән килгән; **изве́чный вопро́с** электән килгән һорау

**ИЗВЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **извести́ть**

**ИЗВЕЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **извести́ть** **2.** (*сообщение*) хәбәр, белдереү; **официа́льное извеще́ние** рәсми хәбәр **3.** (*документ*) белдереү ҡағыҙы; **извеще́ние на получе́ние посы́лки** посылка тураһында белдереү ҡағыҙы

**ИЗВИ́В** *м* бөгөл, боролма, бөгөлөш; **изви́вы реки́** йылға бөгөлдәре

**ИЗВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бөгөлөп-һығылып тороу, борғоланыу; **среди́ камне́й извива́лась змея́** таштар араһында йылан борғолана ине **2.** (*о реке, дороге*) бормаланыу, бөгөлөү; **доро́га извива́лась ме́жду сада́ми** баҡсалар араһында юл бормаланып ята

**ИЗВИ́ЛИНА** *ж* бөгөл, борма, боролма; **изви́лины реки́** йылға бөгөлө ♦ **изви́лины мо́зга** *анат.* мейе йыйырсыҡтары

**ИЗВИ́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое борма-борма, боролмалы; **изви́листая доро́га** борма-борма юл; **изви́листая ли́ния** боролмалы һыҙыҡ

**ИЗВИНЕ́НИЕ** *с* **1.** ғәфү үтенеү, ғәфү итеүҙе (кисереүҙе) һорау; **проси́ть извине́ния** ғәфү үтенеү **2.** (*основание для оправдания*) кисерергә (ғәфү итергә) сәбәп (нигеҙ)

**ИЗВИНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғәфү итерлек, кисерерлек; **извини́тельная оши́бка** ғәфү итерлек хата **2.** ғәфү үтенеү ...ы; **извини́тельное письмо́** ғәфү үтенеү хаты

**ИЗВИНИ́ТЬ** *сов. кого-что* ғәфү итеү, кисереү; **извини́те за беспоко́йство** борсоғаным өсөн (кисерегеҙ) ғәфү итегеҙ; **извини́те** ғәфү итегеҙ ♦ **нет, уж (э́то) извини́(те)** юҡ инде, ғәфү ит(егеҙ); **извини́(те) за выраже́ние** (насар) һүҙ өсөн ғәфү ит(егеҙ)

**ИЗВИНИ́ТЬСЯ** *сов.* ғәфү үтенеү, ғәфү итеүҙе һорау, кисереүҙе һорау; **извини́ться за опозда́ние** һуңлаған өсөн ғәфү үтенеү

**ИЗВИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **извини́ть**

**ИЗВИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **извини́ться** **2.** *страд. от* **извиня́ть**

**ИЗВИНЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **извиня́ть** **2.** *прил.* ғәфү итерлек; **извиня́ющие обстоя́тельства** ғәфү итерлек шарттар

**ИЗВИНЯ́ЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** *прич. от* **извиня́ться** **2.** *прил.* ғәфү үтенеүсе, үтенесле; **извиня́ющийся го́лос** ғәфү үтенеүсе тауыш

**ИЗВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **извле́чь**

**ИЗВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **извле́чься**

**ИЗВЛЕЧЕ́НИЕ** *с см.* **извле́чь**

**ИЗВЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* алыу, тартып алыу, сығарыу; **извле́чь пу́лю из ра́ны** яранан пуляны тартып алыу **2.** *что* (*добыть*) алыу, эшкәртеп алыу; **извле́чь сок из расте́ний**

үҫемлектәрҙән һут алыу **3.** *что*; *перен.* (*выбрать*) һайлап алыу; **извле́чь но́вые да́нные из архи́вных материа́лов** архив материалдарынан яңы мәғлүмәттәр һайлап алыу ♦ **извле́чь ко́рень** *мат.* тамыр табыу; **извле́чь уро́к** һабаҡ алыу

**ИЗВЛЕ́ЧЬСЯ** *сов.* (ҡайҙандыр) алыныу, тартып алыныу (сығарылыу)

**ИЗВНЕ́** *нареч.* тыштан, тышҡы яҡтан, ситтән; **по́мощь извне́** ситтән ярҙам

**ИЗВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **извести́**

**ИЗВОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **извести́сь 2.** *страд. от* **изводи́ть**

**ИЗВО́З** *м* ылаусылыҡ, ылау ҡыуыу (сабыу), йөк ташыу; **занима́ться изво́зом** ылау ҡыуыу менән шөғөлләнеү

**ИЗВО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ылау ...ы, ылау сабыу (ҡыуыу) ...ы; **изво́зный про́мысел** ылау сабыу кәсебе

**ИЗВО́ЗЧИК** *м* **1.** (*кучер*) ылаусы, йөк ташыусы **2.** (*экипаж с кучером*) извозчик; **е́хать на изво́зчике** извозчик менән барыу

**ИЗВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **изверну́ться**

**ИЗВОРО́ТЛИВОСТЬ** *ж* **1.** йылғырлыҡ; **изворо́тливость зве́ря** кейектең йылғырлығы **2.** тапҡырлыҡ, сослоҡ; **изворо́тливость ума́** аҡыл сослоғо

**ИЗВОРО́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*увёртливый*) йылғыр, өлгөр; **изворо́тливый зверь** йылғыр кейек **2.** (*находчивый, ловкий*) тапҡыр, зирәк, етеҙ; **изворо́тливый челове́к** тапҡыр кеше; **изворо́тливый ум** зирәк аҡыл

**ИЗВРАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* боҙоу, үҙгәртеү, боҙоп (үҙгәртеп) күрһәтеү; **изврати́ть фа́кты** факттарҙы боҙоп күрһәтеү; **изврати́ть и́стину** дөрөҫлөктө үҙгәртеп күрһәтеү **2.** *кого-что* (*оказать дурное влияние*) боҙоу, боҙоп бөтөү (бөтөрөү)

**ИЗВРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **изврати́ть**

**ИЗВРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изврати́ть 2.** нормаль булмаған хәл, боҙолоу

**ИЗВРАЩЁННОСТЬ** *ж* насар (яман) ҡылыҡ, боҙолғанлыҡ, аҙғынлыҡ, ысынға тап килмәгән; **нра́вственная извращённость** әхлаҡи аҙғынлыҡ

**ИЗВРАЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изврати́ть 2.** *прил.* нормаль булмаған, боҙоп (үҙгәртеп) аңлатылған, яңылыш; **извращённые поня́тия** үҙгәртелгән, боҙоп аңлатылған төшөнсәләр **3.** *прил.* аҙғын, боҙоҡ; тәбиғи булмаған; **извращённый вкус** тәбиғи булмаған зауыҡ

**ИЗГИ́Б** *м* бөгөл, бөгөлөш, боролош, боролма; **изги́бы доро́ги** юл боролмалары

**ИЗГИБА́ТЬ** *несов. см.* **изогну́ть**

**ИЗГИБА́ТЬСЯ** *несов. см.* **изогну́ться**

**ИЗГЛА́ДИТЬ** *сов. что* оноттороу, юҡҡа сығарыу, бөтөрөү; **изгла́дить неприя́тные впечатле́ния** күңелһеҙ тәьҫораттарҙы оноттороу ♦ **изгла́дить из па́мяти** *что* хәтерҙән юйыу (сығарыу)

**ИЗГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* онотолоу, юҡҡа сығыу, бөтөү ♦ **изгла́диться из па́мяти** онотолоу, хәтерҙән сығыу

**ИЗГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. от* **изгла́дить**

**ИЗГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изгла́диться 2.** *страд. от* **изгла́живать**

**ИЗГЛОДА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* кимереп (ашап) бөтөрөү

**ИЗГНА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изгна́ть**; **изгна́ние врага́** дошманды ҡыуыу **2.** (*ссылка*) һөргөн; **возвраща́ться из изгна́ния** һөргөндән ҡайтыу; **жить в изгна́нии** һөргөндә йәшәү

**ИЗГНА́ННИК** *м* һөрөлгән (ҡыуылған, һөргөндәге) ир-ат; **изгна́нница** *ж* һөрөлгән (һөргөндәге, ҡыуылған) ҡатын-ҡыҙ

**ИЗГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*выгнать*) ҡыуыу, ҡыуып ебәреү, һөрөү, һөргөнгә ебәреү **2.** *что* (*устранить, избавиться*) юҡҡа сығарыу, бөтөрөү, алып (сығарып) ташлау; **изгна́ть из употребле́ния** *что-л.* *нимәнелер* ҡулланыуҙан алып ташлау

**ИЗГО́Й** *м* (*человек, отвергнутый обществом*) мөртәт, ситкә ҡағылған кеше

**ИЗГОЛО́ВЬЕ** *с* баш яҡ, баш осо, баш аҫты; **у изголо́вья** баш осонда; **положи́ть поду́шку в изголо́вье** баш аҫтына мендәр һалыу

**ИЗГОЛОДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ныҡ асығыу; **изголода́ться в пути́** юлда ныҡ асығыу **2.** *по чему-л.*; *перен.* (*истомиться, соскучиться*) һыуһау, зарығыу, тилмереү, һағыныу; **изголода́ться по хоро́шей кни́ге** яҡшы китапҡа һыуһау

**ИЗГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **изгна́ть**

**И́ЗГОРОДЬ** *ж* кәртә, ситән, шаҡарма; **ста́вить и́згородь** ситән тотоу

**ИЗГОТОВИ́ТЕЛЬ** *м* әҙерләүсе; **заво́д-изготови́тель** әҙерләүсе завод

**ИЗГОТО́ВИТЬ** *сов. что* эшләү, яһау, әҙерләү; **изгото́вить маке́т** макет әҙерләү

**ИЗГОТО́ВИТЬСЯ** *сов. к чему* әҙерләнеү; **изгото́виться к прыжку́** һикерергә әҙерләнеү

**ИЗГОТО́ВКА** *ж см.* **изгото́вить** — **изготовля́ть** ♦ **взять ружьё на изгото́вку** мылтыҡты атырға әҙерләү

**ИЗГОТОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **изгото́вить**

**ИЗГОТОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изгото́виться 2.** *страд. от* **изготовля́ть**

**ИЗГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **изгры́зть**

**ИЗГРЫ́ЗТЬ** *сов. что* кимереп бөтөрөү (эштән сығарыу); **мы́ши изгры́зли мешо́к** сысҡандар тоҡто кимереп эштән сығарған

**ИЗДАВА́ТЬ I** *несов. см.* **изда́ть** I

**ИЗДАВА́ТЬ II** *несов. см.* **изда́ть** II

**ИЗДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*печататься*) нәшер ителеү, баҫылыу, баҫып сығарылыу; **издаётся мно́го газе́т и журна́лов** күп гәзит һәм журналдар баҫып сығарыла **2.** *страд. от* **издава́ть** I

**И́ЗДАВНА** *нареч.* әллә ҡасандан, элек-электән, күптәнән бирле; **сюда́ и́здавна приез-**

**жа́ли отдыха́ть** элек-электән бында ял итергә киләләр ине

**ИЗДАЛЕКА́** и **ИЗДАЛЁКА** *нареч.* алыҫтан, йыраҡтан; **видне́ться издалека́** алыҫтан күренеү ♦ **нача́ть издалека́** уратып һөйләү

**И́ЗДАЛИ** *нареч. см.* **издалека́**; **уви́деть и́здали** алыҫтан күреү

**ИЗДА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изда́ть** I; **изда́ние уче́бников** дәреслектәр баҫтырыу **2.** баҫма; **пе́рвое изда́ние** беренсе баҫма; **периоди́ческое изда́ние** ваҡытлы баҫма; **спи́сок изда́ний** баҫмалар исемлеге; **сокращённое изда́ние** ҡыҫҡартылған баҫма

**ИЗДА́ТЕЛЬ** *м* баҫтырып сығарыусы (*кеше йәки предприятие*), нәшерсе (*кеше*)

**ИЗДА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое нәшриәт ...ы; **изда́тельский план** нәшриәт планы; **изда́тельское де́ло** нәшриәт эше

**ИЗДА́ТЕЛЬСТВО** *с* нәшриәт; **Башки́рское кни́жное изда́тельство** Башҡортостан китап нәшриәте; **госуда́рственное изда́тельство** дәүләт нәшриәте

**ИЗДА́ТЬ I** *сов. что* баҫтырыу, баҫтырып сығарыу, нәшер итеү; **изда́ть кни́гу** китап баҫтырыу **2.** сығарыу, иғлан итеү; **изда́ть ука́з** фарман сығарыу; **изда́ть зако́н** закон сығарыу

**ИЗДА́ТЬ II** *сов.* **1.** *что* (о *звуке*) тауыш сығарыу (биреү); **изда́ть го́лос** тауыш биреү **2.** (*о запахе*) сығарыу, аңҡытыу, бөркөү; **изда́ть арома́тный за́пах** хуш еҫ сығарыу

**ИЗДЕВА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое мыҫҡыллы, мәсхәрәле; **издева́тельский смех** мәсхәрәле көлөү; **издева́тельский тон** мыҫҡыллы тон

**ИЗДЕВА́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** *см.* **издева́ться 2.** (*унижение, оскорбление*) мәсхәрә, мыҫҡыл, мыҫҡыллау; **мне надое́ли его́ издева́тельства** уның мыҫҡыллауҙары мине туйҙырҙы

**ИЗДЕВА́ТЬСЯ** *несов. над кем-чем* мыҫҡыл (мәсхәрә) итеү, мәсхәрәләү, мыҫҡыллау

**ИЗДЁВКА** *ж*; *разг. см.* **издева́тельство** 2

**ИЗДЕ́ЛИЕ** *с* изделие, нәмә, эшләнмә, әйбер (*эшләнгән, етештерелгән һ.б.*); **трикота́жные изде́лия** трикотаж әйберҙәр

**ИЗДЁРГАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **издёргать 2.** *прил.* ҡаҡшаған, йонсоған; **издёрганный челове́к** йонсоған кеше

**ИЗДЁРГАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡаҡшатып (интектереп, яфалап, йонсотоп) бөтөү, эштән сығарыу; **издёргать приди́рками** нахаҡ ғәйептәр менән интектереү

**ИЗДЁРГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡаҡшау, йонсоп (интегеп) бөтөү, эштән сығыу; **он совсе́м издёргался** ул бөтөнләй эштән сыҡҡан

**ИЗДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **издёргать**

**ИЗДЁРГИВАТЬСЯ** *несов. см.* **издёргаться**

**ИЗДЕРЖА́ТЬ** *сов. что* тотоноп (таратып) бөтөү; **издержа́ть все де́ньги** бар аҡсаны тотоноп бөтөү

**ИЗДЕРЖА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* тотоноп бөтөү (*аҡсаны*); **издержа́ться в доро́ге** юлда аҡсаны тотоноп бөтөү

**ИЗДЕ́РЖКИ** *мн.* (*ед.* **изде́ржка** *ж*) сығымдар; **изде́ржки произво́дства** етештереү сығымдары; **тра́нспортные изде́ржки** юл сығымдары

**ИЗДО́ХНУТЬ** *сов.* үлеү (*хайуандарға ҡарата*)

**ИЗДРЕ́ВЛЕ** *нареч.*; *книжн.* элек-электән, борон-борондан

**ИЗДРОБИ́ТЬ** *сов. что* ваҡлап бөтөрөү

**ИЗДЫХА́НИЕ: до после́днего издыха́ния** һуңғы һулышҡа тиклем, үлгәнсе; **при после́днем издыха́нии** һуңғы һулыш алғанда, йән бирер алдынан, үлер алдынан

**ИЗДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **издо́хнуть**

**ИЗЖА́ЛИТЬ** *сов. кого-что* сағыу, сағып бөтөрөү; **пчёлы изжа́лили мне всю ше́ю** бал ҡорттары муйынымды сағып бөтөрҙө

**ИЗЖА́РИТЬ** *сов. что* ҡурып (ҡыҙҙырып) бешереү; **изжа́рить ку́рицу** тауыҡ ҡыҙҙырып бешереү

**ИЗЖА́РИТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡурылып (ҡыҙҙырылып) бешеү; **гусь изжа́рился** ҡаҙ ҡурылып бешкән **2.** *разг.* (артыҡ) эҫеү, эҫергәнеү, яныу; **изжа́риться на со́лнце** ҡояшта яныу

**ИЗЖЕ́ЧЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*прожечь*) яндырып (тишкеләп) бөтөрөү; **изже́чь хала́т кислото́й** халатты кислота менән тишкеләп бөтөрөү **2.** (*сжечь*) яғыу, яғып бөтөрөү; **изже́чь весь у́голь** барлыҡ күмерҙе яғып бөтөрөү

**ИЗЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **изжи́ть**

**ИЗЖИ́ТЬ** *сов. что* бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, арыныу; **изжи́ть недоста́тки** кәмселектәрҙе бөтөрөү

**ИЗЖО́ГА** *ж* үҙәк көйөү, һарыу ҡайнау; **страда́ть изжо́гой** үҙәк көйөү менән яфаланыу

**ИЗ-ЗА** *предлог с род. п.* **1.** (*при обозначении предмета, лица, с противоположной или обратной стороны которых направлено действие*) -дан/-дән, артынан, аръяғынан; **из-за угла́** мөйөштән; **встать из-за стола́** өҫтәл артынан тороу; **из-за две́ри** ишек артынан; **прие́хал из-за мо́ря** диңгеҙ аръяғынан килгән

**2.** (*при указании на цель, причину или виновника какого-л. действия, близок по значению словам "по причине", "благодаря", "ради"*) өсөн, арҡала, -ға/-гә күрә, арҡаһында; **жени́ться из-за де́нег** аҡсаһы өсөн өйләнеү; **из-за тебя́** һинең арҡала; **опозда́ть из-за дождя́** ямғыр арҡаһында һуңға ҡалыу

**ИЗЗЯ́БНУТЬ** *сов.*; *разг.* нык өшөү, туңып бөтөү

**ИЗЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **изложи́ть**

**ИЗЛА́ЗИТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡыҙырыныу, бөтә ерҙә лә булыу, йөрөмәгән ерҙе ҡалдырмау

**ИЗЛЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ялҡауланып бөтөү

**ИЗЛЁТ** *м* (осоп) төшөр алдынан (*хәл*); **пу́ля на излёте бьёт сла́бо** төшөр алдынан пуля көсһөҙ була

**ИЗЛЕЧЕ́НИЕ** *с см.* **излечи́ть**, **излечи́ться**; **по́лное излече́ние** тулыһынса һауығыу

**ИЗЛЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **излечи́ть**

**ИЗЛЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **излечи́ться** **2.** (*поддаваться лечению*) дауалап булыу **3.** *страд. от* **излe̋чивать**

**ИЗЛЕЧИ́МЫЙ,** -ая, -ое дауалап булған; **излечи́мая боле́знь** дауалап булған ауырыу (сир)

**ИЗЛЕЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** дауалап һауыктырыу (сәләмәтләндереү) **2.** *перен.* (*избавить*) арындырыу, ҡотолдороу; **излечи́ть от тоски́** һағыштан арындырыу

**ИЗЛЕЧИ́ТЬСЯ** *сов. от чего* дауаланып һауығыу (сәләмәтләнеү); **излечи́ться от туберкулёза** туберкулёздан дауаланып һауығыу **2.** *перен.* (*избавиться*) ҡотолоу; **излечи́ться от поро́ков** кәмселектәрҙән ҡотолоу

**ИЗЛИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **изли́ть** **2.** *перен., книжн.* бөркөү, түгеү, сәсеү (*тауыш, еҫ, яҡтылыҡ*)

**ИЗЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изли́ться** **2.** *перен., книжн.* бөркөлөү, сәселеү, түгелеү (*тауыш, еҫ, яҡтылыҡ тураһында*) **3.** *страд. от* **излива́ть**

**ИЗЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *уст.* түгеү, сәсеү; **изли́ть пото́ки слёз** күп йәш түгеү **2.** *перен.* һөйләп (әйтеп) биреү, түгеп һалыу, белдереү, (йөрәктәген) бушатыу; **изли́ть свой гнев** асыуыңды әйтеп биреү; **изли́ть свои́ чу́вства** тойғоларыңды түгеп һалыу ♦ **изли́ть ду́шу** күңелеңдәге әйтеп биреү, йөрәкте асыу, эсте бушатыу

**ИЗЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** түгелеү, ағылыу, яуыу **2.** *перен.* яуҙырыу, белдереү; **изли́ться в благода́рностях** рәхмәт яуҙырыу

**ИЗЛИ́ШЕК** *м* **1.** (*избыток*) артыҡ, артып ҡалғаны; **прода́жа изли́шков хле́ба** артыҡ игенде һатыу **2.** (*обилие*) артыҡлыҡ, күплек; **изли́шек воды́ в по́чве** тупраҡта һыу күплеге; **изли́шек тепла́** йылылыҡтың артыҡлығы ♦ **с изли́шком** артығы менән

**ИЗЛИ́ШЕСТВО** *с* кәрәгенән артыҡ, артыҡлыҡ; **допуска́ть изли́шества** кәрәгенән артыҡ ебәреү; **архитекту́рные изли́шества** архитектуралағы артыҡлыҡтар

**ИЗЛИ́ШЕСТВОВАТЬ** *несов.*; *книжн.* кәрәгенән артыҡ ҡулланыу

**ИЗЛИ́ШНИЙ,** -яя, -ее кәрәгенән артыҡ; **изли́шнее любопы́тство** кәрәгенән артыҡ ҡыҙыҡһыныу; **изли́шняя поспе́шность** кәрәгенән артыҡ ашығыу; **счита́ть изли́шним** кәрәгенән артыҡ тип һанау

**ИЗЛИЯ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изли́ться** 1; **2.** *обычно мн.* **излия́ния**; *перен.* сер сисеү, йөрәкте асыу, эсте бушатыу, һөйләү; **дру́жеские излия́ния** дуҫтарса сер сисеү

**ИЗЛОВИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тотоу, тотоп алыу; **излови́ть во́ра** ҡараҡты тотоу

**ИЗЛОВЧИ́ТЬСЯ** *сов. с неопр.* и *без доп.*; *разг.* рәтен (яйын) табыу, яйын тура килтереү; **он изловчи́лся и уда́рил по мячу́** ул, яйын табып, тупты тибеп тә ебәрҙе

**ИЗЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изложи́ть**; **изложе́ние своего́ прое́кта на бума́ге** үҙеңдең проектыңды ҡағыҙға яҙып биреү **2.** (*письменный пересказ*) изложение

**ИЗЛОЖИ́ТЬ** *сов. что* яҙып (һөйләп, аңлатып) биреү; **изложи́ть своё мне́ние** үҙеңдең уйыңды һөйләп биреү; **изложи́ть про́сьбу** үтенесте яҙып биреү

**ИЗЛО́ЖНИЦА** *ж*; *тех.* ҡалып (*иретелгән металдарҙы ҡойоу өсөн*)

**ИЗЛО́М** *м* **1.** (*место перелома, разлома*) һынған (ватылған) урын **2.** (*поворот, изгиб*) боролма; **изло́мы доро́ги** юл боролмалары

**ИЗЛО́МАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **излома́ть** **2.** *прил.* боролмалы, һыныҡ; **изло́манная ли́ния** һыныҡ һыҙыҡ **3.** *прил.*; *перен.* боҙолған; **изло́манная жизнь** боҙолған тормош

**ИЗЛОМА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һындырып (ватып) бөтөрөү **2.** *кого-что*; *перен.* боҙоу, боҙоп бөтөрөү; **излома́ть жизнь** тормош боҙоу

**ИЗЛОМА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ватылып (һынып) бөтөү; **игру́шка излома́лась** уйынсыҡ ватылып бөткән **2.** *перен., разг.* насар яҡҡа үҙгәреү, боҙолоу

**ИЗЛУЧА́ТЬ** *несов. что*; *прям., перен.* һибеү, таратыу, сәсеү, бөркөү; **со́лнце излуча́ет тепло́** ҡояш йылы тарата; **излуча́ть свет** яҡтылыҡ таратыу; **излуча́ть ра́дость** шатлыҡ бөркөү

**ИЗЛУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һибелеү, нурланыу, таралыу, сәселеү, бөркөлөү **2.** *страд. от* **излуча́ть**

**ИЗЛУЧЕ́НИЕ** *с см.* **излучи́ть** — **излуча́ть**, **излучи́ться** — **излуча́ться**; **электромагни́тное излуче́ние** электромагнит тулҡындарының таралыуы ♦ **радиоакти́вное излуче́ние** *физ.* радиоактив нурланыш; **светово́е излуче́ние** яҡтылыҡ нурланышы

**ИЗЛУ́ЧИНА** *ж* бөгөл, боролма, ҡырҡа боролош (*йылғала һ.б.*)

**ИЗЛУЧИ́ТЬ** *сов. см.* **излуча́ть**

**ИЗЛУЧИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **излуча́ться**

**ИЗЛЮБИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *уст.* күңел(гә) оҡшатыу (тартылыу), артығыраҡ (яҡшыраҡ) күреү, яратыу

**ИЗЛЮ́БЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **излюби́ть** **2.** *прил.* яратҡан, мауыҡҡан, күңел тартҡан; **излю́бленная те́ма** яратҡан тема; **излю́бленное заня́тие** мауыҡҡан эш; **излю́бленный приём** күңел тартҡан алым

**ИЗМА́ЗАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* буяп (бысратып) бөтөрөү; **изма́зать ска́терть** ашъяулыҡты бысратып бөтөү

**ИЗМА́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* буялып (бысранып) бөтөү; **изма́заться в гли́не** балсыҡҡа буялып бөтөү

**ИЗМАРА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* бысратып (буяп) бөтөрөү; **измара́ть пла́тье** күлдәкте бысратып бөтөрөү

**ИЗМАРА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ныҡ бысраныу (буялыу)

**ИЗМА́ТЫВАНИЕ** *с см.* **изма́тывать**, **изма́тываться**; **изма́тывание проти́вника** дошманды арытыу

**ИЗМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **измота́ть**

**ИЗМА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **измота́ться** **2.** *страд. от* **изма́тывать**

**ИЗМЕЛЬЧА́НИЕ** *с см.* **измельча́ть** I; **измельча́ние скота́** мал-тыуарҙың вағайыуы (*тоҡомо боҙолоу*)

**ИЗМЕЛЬЧА́ТЬ I** *сов.* **1.** (*выродиться*) ваҡҡа әйләнеү, вағайыу, тоҡомо боҙолоу, ваҡланыу; **скот измельча́л** мал-тыуарҙың тоҡомо боҙолдо; **фрукто́вые дере́вья измельча́ли от недоста́тка ухо́да** тәрбиә етешмәгәнлектән емеш ағастары вағайҙы **2.** (*о водоёмах*) һайығыу; **о́зеро измельча́ло** күл һайыҡты

**ИЗМЕЛЬЧА́ТЬ II** *несов. см.* **измельчи́ть**

**ИЗМЕЛЬЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **измельчи́ться** **2.** *страд. от* **измельча́ть** II

**ИЗМЕЛЬЧЕ́НИЕ** *с см.* **измельчи́ть** — **измельча́ть** II; **измельче́ние гру́бых кормо́в** тупаҫ аҙыҡтарҙы ваҡлау

**ИЗМЕЛЬЧИ́ТЬ** *сов. что* ваҡлау, онтау, тураҡлау; **измельчи́ть ка́мень** таш ваҡлау; **измельчи́ть соль** тоҙ онтау

**ИЗМЕЛЬЧИ́ТЬСЯ** *сов.* ваҡланыу, онталыу

**ИЗМЕ́НА** *ж см.* **измени́ть** II — **изменя́ть** II; **изме́на Ро́дине** Ватанға хыянат итеү; **изме́на дру́жбе** дуҫлыҡҡа хыянат итеү; **супру́жеская изме́на** ирҙең (ҡатындың) хыянат итеүе

**ИЗМЕНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **измени́ть** I — **изменя́ть** I, **измени́ться** — **изменя́ться**; **измене́ние пого́ды** һауа торошоноң үҙгәреүе; **измене́ние междунаро́дной обстано́вки** халыҡ-ара хәлдең үҙгәреүе; **измене́ние ско́рости** тиҙлек үҙгәреү **2.** үҙгәреш; **внести́ измене́ния в текст** текстҡа үҙгәрештәр индереү ♦ **измене́ние по падежа́м** *лингв.* килеш менән үҙгәреш

**ИЗМЕНИ́ТЬ I** *сов. кого-что* үҙгәртеү; **ве́тер измени́л направле́ние** ел йүнәлешен үҙгәртте; **измени́ть реше́ние** ҡарарҙы үҙгәртеү; **измени́ть покро́й пла́тья** күлдәктең өлгөһөн үҙгәртеү

**ИЗМЕНИ́ТЬ II** *сов. кому-чему* **1.** (*о предательстве*) хыянат итеү; **измени́ть Ро́дине** Ватанға хыянат итеү **2.** (*нарушить верность*) хыянат итеү, һүҙендә тормау; **измени́ть прися́ге** антҡа хыянат итеү; **измени́ть своему́ сло́ву** үҙ һүҙендә тормау **3.** *перен.* алдау, яңылышыу; **па́мять ему́ измени́ла** уның хәтере яңылышты

**ИЗМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* үҙгәреү, башҡаланыу; **измени́ться к лу́чшему** яҡшы яҡҡа үҙгәреү; **отноше́ние к рабо́те измени́лось** эшкә ҡараш үҙгәрҙе ♦ **измени́ться в лице́** төҫ үҙгәреү, тәғәйерләнеү

**ИЗМЕ́ННИК** *м* и **ИЗМЕ́ННИЦА** *ж* хыянатсы, хаин, һатлыҡ йән

**ИЗМЕ́ННИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое (*предательский*) хыянатсыл; **изме́ннический посту́пок** хыянатсыл ҡылыҡ

**ИЗМЕ́НЧИВОСТЬ** *ж* **1.** үҙгәреүсәнлек, алмашыныу, алмашынып тороусанлыҡ; **изме́нчивость пого́ды** һауа торошоноң алмашыныуы; **изме́нчивость хара́ктера** холоҡтоң үҙгәреүсәнлеге **2.** *биол.* үҙгәреүсәнлек

**ИЗМЕ́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое үҙгәреүсән, алмашыныусан; **изме́нчивая пого́да** алмашыныусан һауа торошо; **изме́нчивый хара́ктер** үҙгәреүсән холоҡ

**ИЗМЕНЯ́ЕМОСТЬ** *ж* үҙгәреүсәнлек, үҙгәреү

**ИЗМЕНЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое үҙгәрмәле, үҙгәрә (алмашына) торған, үҙгәреүсән; **изменя́емые величи́ны** үҙгәрмәле дәүмәлдәр; **изменя́емые ча́сти ре́чи** *лингв.* үҙгәрә торған һүҙ төркөмдәре

**ИЗМЕНЯ́ТЬ I** *несов. см.* **измени́ть** I

**ИЗМЕНЯ́ТЬ II** *несов. см.* **измени́ть** II

**ИЗМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **измени́ться** **2.** *страд. от* **изменя́ть** I

**ИЗМЕРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изме́рить** — **измеря́ть**; **едини́ца измере́ния** үлсәү берәмеге; **измере́ние высоты́** бейеклек үлсәү; **измере́ние температу́ры** температура үлсәү **2.** *мат.* үлсәм; **в ку́бе три измере́ния** кубта өс үлсәм бар

**ИЗМЕРИ́МЫЙ,** -ая, -ое үлсәнмәле; **измери́мая величина́** үлсәнмәле дәүмәл

**ИЗМЕРИ́ТЕЛЬ** *м* үлсәү, үлсәгес; **автомати́ческий измери́тель** автомат(ик) үлсәү

**ИЗМЕРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үлсәү ...ы; **измери́тельные прибо́ры** үлсәү приборҙары; **измери́тельные инструме́нты** үлсәү ҡорамалдары; **измери́тельная ле́нта** үлсәү таҫмаһы

**ИЗМЕ́РИТЬ** *сов. что* үлсәү; **изме́рить глубину́** тәрәнлек үлсәү; **изме́рить больно́му температу́ру** ауырыуҙың температураһын үлсәү

**ИЗМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **изме́рить**

**ИЗМЕРЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **измеря́ть**

**ИЗМОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое ныҡ йонсоған, әлһерәгән; **измождённый вид** йонсоған ҡиәфәт

**ИЗМО́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* һыуланыу, күшегеү, еүешләнеү; **он измо́к под дождём** ул ямғырҙа күшеккән

**ИЗМО́Р: брать (взять) измо́ром**; **брать (взять) на измо́р**: 1) хәлдән тайҙырып (аслыҡтан интектереп) алыу, еңеү; 2) *перен.* йөҙәтеп бөтөрөү, теңкәһен ҡоротоу

**И́ЗМОРОЗЬ** *ж* (*иней*) бәҫ, ҡырау

**И́ЗМОРОСЬ** *ж* ваҡ (быҫҡаҡ) ямғыр; **осе́нняя и́зморось** көҙгө быҫҡаҡ ямғыр

**ИЗМОТА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* хәлдән тайҙырыу, ҡаҡшатыу, арытыу; **тяжёлая рабо́та измота́ла** ауыр эш ҡаҡшатты

**ИЗМОТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* хәлдән тайыу, ҡаҡшау; **измота́лся за́ день** бер көндә хәлдән тайҙы

**ИЗМОЧА́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **измоча́лить 2.** *прил.* әлһерәгән, хәлдән тайған

**ИЗМОЧА́ЛИВАТЬ** *несов. от* **измоча́лить**

**ИЗМОЧА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **измоча́литься 2.** *страд. от* **измоча́ливать**

**ИЗМОЧА́ЛИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* теткеләп (йыуғысландырып, сүбәкләндереп) бөтөрөү; **измоча́лить кнут** сыбыртҡыны сүбәкләндереп бөтөрөү **2.** *перен.* хәлдән тайҙырыу, әлһерәтеү; **пое́здка измоча́лила его́** юл йөрөү уны әлһерәткән

**ИЗМОЧА́ЛИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** теткеләнеп (йыуғысланып, сүбәкләнеп) бөтөү; **верёвка измоча́лилась** бау теткеләнеп бөткән **2.** *перен.* хәлдән тайыу, әлһерәү; **совсе́м измоча́лился за после́днее вре́мя** һуңғы ваҡытта бөтөнләй әлһерәне

**ИЗМУ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **измучить 2.** *прил.* интеккән, ғазапланған, ҡаҡшаған; **изму́ченный вид** интеккән ҡиәфәт

**ИЗМУ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* яфалау, интектереү, ғазаплау; **изму́чить тяжёлой рабо́той** ауыр эш менән яфалау

**ИЗМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.* йөҙәү, интегеү, йөҙәп (интегеп) бөтөү; **лю́ди изму́чились от до́лгой доро́ги** оҙон юлдан кешеләр интегеп бөттө

**ИЗМЫВА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **издева́тельский**

**ИЗМЫВА́ТЕЛЬСТВО** *с*; *разг. см.* **издева́тельство**

**ИЗМЫВА́ТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **издева́ться**

**ИЗМЫ́СЛИТЬ** *сов. см.* **измышля́ть**

**ИЗМЫШЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **измы́слить** — **измышля́ть 2.** уйҙырма, ялған; **гну́сные измышле́ния врага́** дошмандың әшәке уйҙырмалары

**ИЗМЫШЛЯ́ТЬ** *несов. что* уйлап сығарыу, шыттырыу; **измышля́ть небыли́цы** юҡ-бар нәмәләр уйлап сығарыу (шыттырып һөйләү)

**ИЗМЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **измя́ть 2.** *прил.* таушалған, бөгәрләнгән; **измя́тый конве́рт** бөгәрләнгән конверт; **измя́тое лицо́** таушалған йөҙ

**ИЗМЯ́ТЬ** *сов. что* таушалдырып (борһалап, бөгәрләп) бөтөрөү; **измя́ть бума́гу** ҡағыҙҙы таушалдырып бөтөрөү

**ИЗМЯ́ТЬСЯ** *сов.* таушалып (борһаланып, бөгәрләнеп) бөтөү

**ИЗНА́НКА** *ж* **1.** тиҫкәре (һул) яҡ, эске яҡ, эсе; **изна́нка тка́ни** туҡыманың тиҫкәре яғы **2.** *перен.* йәшерен яҡ, сер, арт; **изна́нка собы́тий** ваҡиғаларҙың сере

**ИЗНА́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **изна́нка**; **изна́ночная сторона́** тиҫкәре яғы

**ИЗНАСИ́ЛОВАНИЕ** *с см.* **изнаси́ловать**

**ИЗНАСИ́ЛОВАТЬ** *сов. кого* көсләү, мәсхәрәләү

**ИЗНАЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* иң тәүге, баштағы; **изнача́льный вид** иң тәүге күренеш

**ИЗНА́ШИВАЕМОСТЬ** *ж*; *спец.* туҙыу, иҫкереү, туҙыу (иҫкереү) дәрәжәһе; **изна́шиваемость маши́ны** машинаның туҙыуы

**ИЗНА́ШИВАНИЕ** *с см.* **изна́шивать, изна́шиваться**; **предохрани́ть дета́ли маши́ны от изна́шивания** машина деталдәрен туҙыуҙан һаҡлау

**ИЗНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **износи́ть**

**ИЗНА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **износи́ться 2.** *страд. от* **изна́шивать**

**ИЗНЕ́ЖЕННОСТЬ** *ж* иркәлек, наҙлылыҡ

**ИЗНЕ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изне́жить 2.** *прил.* иркә, наҙлы; **изне́женный ребёнок** иркә бала; **изне́женная де́вочка** үтә наҙлы ҡыҙыҡай

**ИЗНЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **изне́жить**

**ИЗНЕ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изне́житься 2.** *страд. от* **изне́живать**

**ИЗНЕ́ЖИТЬ** *сов. кого-что* ныҡ (артыҡ) иркәләү, наҙлау; **изне́жить ребёнка** баланы ныҡ иркәләү

**ИЗНЕ́ЖИТЬСЯ** *сов.* артыҡ иркәләнеү, наҙланыу, иркәләнеп (наҙланып) китеү

**ИЗНЕМОГА́ТЬ** *несов. см.* **изнемо́чь**

**ИЗНЕМОЖЕ́НИЕ** *с* хәлһеҙлек, арығанлыҡ, әлһерәү, әлһерәтеү; **довести́ до изнеможе́ния** әлһерәтеп бөтөрөү (хәлен алыу)

**ИЗНЕМОЖЁННЫЙ,** -ая, -ое әлһерәгән, арыған, хәлһеҙ, хәле бөткән; **изнеможённый вид** хәлһеҙ ҡиәфәт

**ИЗНЕМО́ЧЬ** *сов.* арыу, хәлһеҙләнеү, хәлдән тайыу, әлһерәү; **изнемо́чь от уста́лости** арып хәлһеҙләнеү

**ИЗНЕ́РВНИЧАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* борсолоп бөтөү, ныҡ көйәләнеү

**ИЗНИЧТО́ЖИТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* юҡ итеү; **изничто́жить враго́в** дошмандарҙы юҡ итеү

**ИЗНИЧТО́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *прост.* юҡ булыу

**ИЗНО́С** *м см.* **изно́шенность**; **изно́с оде́жды** кейемдең туҙғанлығы ♦ **до изно́су (изно́са)** туҙғансы; **не знать изно́су (изно́са)** туҙыуҙы белмәү; **нет изно́су (изно́са)** *чему* ныҡ, туҙмай

**ИЗНОСИ́ТЬ** *сов. что* кейеп туҙҙырыу, туҙҙырып бөтөрөү; **износи́ть сапоги́** итекте туҙҙырыу

**ИЗНОСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** туҙып бөтөү; **оде́жда износи́лась** кейем туҙып бөткән; **дета́ли маши́ны износи́лись** машинаның деталдәре туҙып бөткән **2.** *перен.*, *разг.* (*состариться*, *одряхлеть*) таушалыу, кәре китеү, кәрһеҙләнеү, ҡартайыу

**ИЗНО́ШЕННОСТЬ** *ж* иҫкергәнлек, туҙғанлыҡ, ылкаһы ҡалмау; **по́лная изно́шенность** ылкаһы ла ҡалмаған

**ИЗНО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **износи́ть 2.** *прил.* туҙған, ҡартайған; **изно́шенная шу́ба** туҙған тун; **изно́шенный органи́зм** ҡартайған организм

**ИЗНУРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изнури́ть** — **изнуря́ть 2.** (*состояние*) йөҙәү, йонсоу; **дойти́ до кра́йнего изнуре́ния** йонсоуҙың сигенә етеү

**ИЗНУРЁННОСТЬ** *ж* (үтә) ныҡ йонсоғанлыҡ (әлһерәгәнлек, йөҙәгәнлек)

**ИЗНУРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изнури́ть 2.** *прил.* ныҡ йонсоған (әлһерәгән, йөҙәгән); **изнурённый челове́к** ныҡ йонсоған кеше; **изнурённый вид** үтә ныҡ әлһерәгән ҡиәфәт

**ИЗНУРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үтә ныҡ йонсотҡос (ауыр), хәлдән тайҙырғыс; **изнури́тельная боле́знь** хәлдән тайҙырғыс ауырыу; **изнури́тельный труд** үтә ауыр хеҙмәт

**ИЗНУРИ́ТЬ** *сов. кого-что* үтә ныҡ йонсотоу (йөҙәтеү), йонсотоп бөтөрөү; **боле́знь изнури́ла** ауырыу үтә ныҡ йонсотто

**ИЗНУРИ́ТЬСЯ** *сов.* үтә ныҡ йонсоу (йөҙәү), йонсоп (йөҙәп) бөтөү; **изнури́ться от бессо́нницы** йоҡоһоҙлоҡтан ныҡ йонсоу

**ИЗНУРЯ́ТЬ** *несов. см.* **изнури́ть**

**ИЗНУРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изнури́ться 2.** *страд. от* **изнуря́ть**

**ИЗНУТРИ́** *нареч.* эстән, эс(ке) яҡтан; **дверь заперта́ изнутри́** ишек эске яҡтан бикле; **пода́ть го́лос изнутри́** *чего-л.* эстән тауыш биреү

**ИЗНЫВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **изны́ть 2.** әлһерәү, хәлһеҙләнеү; **изныва́ть от жары́** эҫенән әлһерәү; **изныва́ть от жа́жды** һыуһап хәлһеҙләнеү

**ИЗНЫ́ТЬ** *сов.* интегеү, яфаланыу, әрнеү; **вся душа́ изны́ла** йөрәгем әрнене

**ИЗО...** *приставка см.* **из...**

**ИЗО** *предлог см.* **из**; **изо всех сил** бөтә көскә; **изо дня в день** көндән-көн, көндән-көнгә

**ИЗОБА́РА** *ж* изобара (**1.** *геофиз. картала һауа баҫымы бер төрлө булған урындарҙы тоташтырыусы һыҙыҡ* **2.** *физ. физик дәүмәлдәр араһындағы бәйләнеште даими баҫым ваҡытында һүрәтләүсе һыҙыҡ*)

**ИЗОБИ́ЛИЕ** *с* күплек, байлыҡ, муллыҡ; **изоби́лие хлебо́в** игендең күплеге; **жить в изоби́лии** муллыҡта йәшәү

**ИЗОБИ́ЛОВАТЬ** *несов. кем-чем* күп (мул, бай) (булыу); **о́зеро изоби́лует ры́бой** күл балыҡтарға бай; **Ура́л изоби́лует поле́зными ископа́емыми** Урал файҙалы ҡаҙылмаларға бай

**ИЗОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бик күп (мул); **изоби́льная расти́тельность** бик күп үҫемлек

**ИЗОБЛИЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **изобличи́ть 2.** *кого-что* күрһәтеп тороу; **произноше́ние изоблича́ет в нём иностра́нца** уның һөйләшеүе сит ил кешеһе икәнен күрһәтеп тора

**ИЗОБЛИЧЕ́НИЕ** *с см.* **изобличи́ть** — **изоблича́ть**; **изобличе́ние престу́пника** енәйәтсене фашлау

**ИЗОБЛИЧИ́ТЕЛЬ** *м* фаш итеүсе, фашлаусы

**ИЗОБЛИЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое фашлаусы, фаш итә торған, ғәйебен аса торған; **изобличи́тельные докуме́нты** фашлаусы документтар; **изобличи́тельные ре́чи** фашлаусы сығыштар

**ИЗОБЛИЧИ́ТЬ** *сов. кого, в чём* фашлау, фаш итеү; **изобличи́ть во лжи** ялғанын фашлау

**ИЗОБРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **изобрази́ть**

**ИЗОБРАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изобрази́ться 2.** *страд. от* **изобража́ть**

**ИЗОБРАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изобрази́ть**, **изобрази́ться 2.** һүрәт, рәсем, һын; **моне́та с изображе́нием герба́** герб төшөрөлгән аҡса **3.** (*образ предмета, отражённый где-л.*) кәүҙәләнеш, сағылыш; **изображе́ние в зе́ркале** көҙгөләге сағылыш

**ИЗОБРАЗИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* тасуирлыҡ ...ы, һүрәтләү ...ы; **сре́дства изобрази́тельности** тасуирлыҡ саралары

**ИЗОБРАЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һүрәтләү ...ы, тасуирлау ...ы; **изобрази́тельные сре́дства** һүрәтләү саралары ♦ **изобрази́тельное иску́сство** һынлы сәнғәт

**ИЗОБРАЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һүрәтләү, кәүҙәләндереү, тасуирлау; **изобрази́ть мо́ре** диңгеҙҙе һүрәтләү; **изобрази́ть приро́ду** тәбиғәтте тасуирлау **2.** (*представить на сцене*) күрһәтеү, (образын) биреү, уйнау **3.** *уст.* (*выразить*) төҫөнә (йөҙөнә) сығыу, сағылыу; **его́ лицо́ изобрази́ло испу́г** уның йөҙөнә ҡурҡыу билдәһе сыҡты

**ИЗОБРАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* күренеү, сағылыу; **на его́ лице́ изобрази́лось удивле́ние** уның йөҙөндә ғәжәпләнеү сағылды

**ИЗОБРЕСТИ́** *сов. что* уйлап табыу (сығарыу); **изобрести́ но́вую маши́ну** яңы машина уйлап сығарыу

**ИЗОБРЕТА́ТЕЛЬ** *м* уйлап табыусы (сығарыусы); **изобрета́тель ра́дио** радио уйлап сығарыусы

**ИЗОБРЕТА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* уйлап табыу (сығарыу) һәләте; **прояви́ть изобрета́тельность** уйлап табыу һәләте күрһәтеү

**ИЗОБРЕТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тапҡыр, зирәк, уйлап табыуға (сығарыуға) һәләтле; **изобрета́тельный челове́к** уйлап табыуға һәләтле кеше; **изобрета́тельный ум** зирәк аҡыл

**ИЗОБРЕТА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое уйлап табыу (сығарыу) ...ы; **изобрета́тельская де́ятельность** уйлап табыу эшмәкәрлеге; **изобрета́тельский тала́нт** уйлап табыу таланты

**ИЗОБРЕТА́ТЕЛЬСТВО** *с* уйлап табыу (сығарыу) эше (эшмәкәрлеге); **занима́ться изобрета́тельством** уйлап табыу эше менән шөғөлләнеү

**ИЗОБРЕТА́ТЬ** *несов. см.* **изобрести́**

**ИЗОБРЕТЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изобрести́ 2.** уйлап табылған (сығарылған) нәмә; **но́вые изобрете́ния** уйлап сығарылған яңы нәмәләр

**ИЗОГЛО́ССА** *ж*; *лингв.* изоглосса

**ИЗО́ГНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изогну́ть 2.** *прил.* эйелгән, бөгөлгән; **изо́гнутая спи́нка сту́ла** ултырғыстың бөгөлгән арты

**ИЗОГНУ́ТЬ** *сов. что* бөгөү, эйеү; **изогну́ть гвоздь** сөйҙө бөгөү; **изогну́ть спи́ну** арҡаны бөгөү; **изогну́ть ше́ю** муйынды эйеү

**ИЗОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* бөгөлөү, эйелеү; **гвоздь изогну́лся** сөй бөгөлдө **2.** (*о реке, дороге*) боролоу; **тропи́нка изогну́лась впра́во** һуҡмаҡ уңға боролдо

**ИЗО́ДРАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **изодра́ть 2.** *прил.* йыртыҡ, йыртылып бөткән; **изо́дранная оде́жда** йыртылып бөткән кейем

**ИЗОДРА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** йыртып (йыртҡылап) бөтөү; **изодра́ть в кло́чья** киҫәктәргә йыртҡылап бөтөрөү **2.** сыйылып бөтөү; **лицо́ изо́драно за́рослями шипо́вника** әлморон ҡыуаҡлығына бите сыйылып бөткән

**ИЗОДРА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** йыртылып бөтөү; **пла́тье изодрало́сь** күлдәк йыртылып бөткән **2.** сыйылып бөтөү

**ИЗОЙТИ́** *сов. чем* хәлдән тайыу, хәлһеҙләнеү; **изойти́ слеза́ми** илай-илай хәлдән тайыу; **изойти́ кро́вью** ҡан ағыуҙан хәлһеҙләнеү

**ИЗОЛГА́ТЬСЯ** *сов.* алдашырға ғәҙәтләнеү, алдаҡсыға әйләнеү

**ИЗОЛИ́НИЯ** *ж*; *геофиз.* изолиния (*географик картала берәй дәүмәлдең бер үк күрһәткесле урындарын тоташтырған һыҙыҡ, мәҫ., баҫым, температура һ.б.*)

**ИЗОЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **изоли́ровать**; **изоли́рование больно́го** ауырыуҙы айырым урынлаштырыу; **изоли́рование ка́беля** кабелде изоляциялау

**ИЗОЛИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изоли́ровать 2.** *прил.* айырылған, айырым; **изоли́рованная ко́мната** айырым бүлмә **3.** *прил.*; *тех.* изоляцияланған; **изоли́рованный электри́ческий про́вод** изоляцияланған электр сымы

**ИЗОЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *кого-что* айырыу, айырым урынлаштырыу, изоляциялау; **изоли́ровать больно́го** ауырыуҙы айырым урынлаштырыу **2.** *что*; *тех.* изоляциялау; **изоли́ровать ка́бель** кабелде изоляциялау

**ИЗОЛИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* айырымланыу, айырым урынлаштырылыу, изоляцияланыу **2.** *несов. страд. от* **изоли́ровать**

**ИЗОЛИРО́ВКА** *ж см.* **изоли́ровать**; **изолиро́вка про́вода** сымды изоляциялау

**ИЗОЛИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* изоляциялаусы, изоляциялай торған; **изолиро́вочные материа́лы** изоляциялаусы материалдар

**ИЗОЛЯ́ТОР** *м* изолятор (**1.** *физ. электр тоғын үткәрмәй торған материал* **2.** *тех. электр үткәргесен беркетә торған быяла йәки ролик* **3.** *ауырыуҙар, енәйәтселәр һ.б. өсөн айырым бүлмә*); **высоковольтные изоля́торы** юғары вольтлы изоляторҙар; **помеща́ть живо́тных в изоля́тор** малдарҙы изоляторға ҡуйыу

**ИЗОЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое изоляция ...ы, изоляциялау ...ы; **изоляцио́нная ка́мера** изоляция камераһы; **изоляцио́нная ле́нта** изоляция таҫмаһы

**ИЗОЛЯ́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **изоли́ровать**, **изоли́роваться**; **изоля́ция зара́зных больны́х** йоғошло ауырыуҙарҙы изоляциялау **2.** *тех.* изоляция; **рези́новая изоля́ция** резина изоляция

**ИЗОМЕ́РЫ** *мн.* (*ед.* **изоме́р** *м*); *хим.* изомерҙар (*составы һәм молекулалар массаһы берҙәй булып, төҙөлөшө, физик һәм химик үҙенсәлектәре яғынан үҙ-ара айырылып торған химик берләшмәләр*)

**ИЗОМОРФИ́ЗМ** *м*; *хим.* изоморфизм (*химик составы һәм кристаллик формалары менән бер үк типтағы матдәләрҙең иретмәлә ҡушылып, ҡатнаш составлы кристалдар бүлеп сығарыу һәләте*)

**ИЗОРВА́ТЬ** *сов. что* йыртҡыслау, йыртҡыслап бөтөрөү; **изорва́ть письмо́** хатты йыртҡыслау; **изорва́ть оде́жду** кейемде йыртҡыслап бөтөрөү

**ИЗОРВА́ТЬСЯ** *сов.* йыртҡысланып бөтөү; **оде́жда изорвала́сь** кейем йыртҡысланып бөткән

**ИЗОТЕ́РМА** *ж* изотерма (**1.** *геогр. картала бер төрлө урта температуралы урындарҙы тоташтырыусы һыҙыҡ* **2.** *физ. дәүмәлдәр араһындағы бәйләнеште даими температура ваҡытында һүрәтләүсе һыҙыҡ*)

**ИЗОТО́ПЫ** *мн.* (*ед.* **изото́п** *м*); *спец.* изотоптар; **радиоакти́вные изото́пы** радиоактив изотоптар; **изото́пы ура́на** уран изотоптары; **усто́йчивые изото́пы** тотороҡло изотоптар

**ИЗОЩРЁННОСТЬ** *ж* һиҙгерлек, камиллыҡ, сослоҡ, зирәклек; **изощрённость ума́** аҡыл камиллығы

**ИЗОЩРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изощри́ть 2.** *прил.* үткер, һиҙгер, зирәк, сос, нескә, нәзәкәтле; **изощрённый ум** һиҙгер аҡыл; **изощрённый вкус** нескә зауыҡ **3.** *прил.* сигенә еткән, аяуһыҙ, хаяһыҙ; **изощрённая жесто́кость** аяуһыҙ ҡатылыҡ

**ИЗОЩРИ́ТЬ** *сов. что* үткер (һиҙгер) итеү, үҫеү, һиҙгерләтеү, камиллаштырыу, яҡшыртыу; **изощри́ть слух** ишетеү һәләтен яҡшыртыу

**ИЗОЩРИ́ТЬСЯ** *сов.* үткерләнеү, камиллашыу, шымарыу; **изощри́лся в наблюда́тельности** күҙәтеүсәнлеге камиллашты; **изощри́лся в вы́думках** уйлап сығарыу һәләте шымарҙы

**ИЗОЩРЯ́ТЬ** *несов. см.* **изощри́ть**

**ИЗОЩРЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **изощри́ться**

**ИЗ-ПОД** и **ИЗ-ПОДО** *предлог с род. п.* **1.** (*при обозначении направленности действия*

*из места, находящегося под чем-л.*) аҫтынан, түбәндән; **из-под земли́** ер аҫтынан

**2.** (*при обозначении происхождения, отправления, появления из окрестностей какого-л. населённого пункта*) яғынан, эргәһенән; **он из-под Оренбу́рга** ул Ырымбур яғынан

**3.** (*при обозначении освобождения от чего-л.*) -дан/-дән; **вы́вести из-под уда́ра** бәләнән алып ҡалыу; **освободи́ть из-под сле́дствия** тикшереүҙән ҡотҡарыу

**4.** (*при указании прежнего назначения предмета*) -дан/-дән, бушаған; **я́щик из-под посу́ды** һауыт-һабанан бушаған йәшник ♦ **из-под (са́мого) но́са** *у кого* танау аҫтынан; **из-под па́лки** көслөк менән, мәжбүри рәүештә; **из-под полы́** итәк аҫтынан

**ИЗ-ПОДО** *предлог см.* **из-под**

**ИЗРАЗЕ́Ц** *м* сынаяҡ кирбес, кафель

**ИЗРАЗЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое сынаяҡ кирбес, кафель; **изразцо́вая печь** кафель мейес

**ИЗРАИЛЬТЯ́НЕ** *мн.* израиллеләр, Израиль халҡы // *ед.* **израильтя́нин** *м* Израиль ир-аты; **израильтя́нка** *ж* Израиль ҡатын-ҡыҙы

**ИЗРА́НИТЬ** *сов. кого-что* яралап (йәрәхәтләп) бөтөрөү; **изра́нить всё те́ло** тәнде йәрәхәтләп бөтөү

**ИЗРАСХО́ДОВАТЬ** *сов. что* тотоп бөтөрөү, тотоноп бөтөү, сарыф итеү; **израсхо́довать де́ньги** аҡсаны тотоноп бөтөү

**ИЗРАСХО́ДОВАТЬСЯ** *сов.* тотолоп (сарыф ителеп) бөтөү; **де́ньги израсхо́дуются** аҡса тотолоп бөтә; **бензи́н израсхо́довался** бензин сарыф ителеп бөткән

**ИЗРЕДИ́ТЬ** *сов. что* (үтә) һирәкләү (*ҫүмлекте*)

**И́ЗРЕДКА** *нареч.* һирәк(ләп), ара-тирә, һирәк-һаяҡ, әллә ниҙә бер; **и́зредка ви́деться** һирәкләп күрешеү; **меня́ть и́зредка** ара-тирә алмаштырыу; **писа́ть и́зредка** әллә ниҙә бер яҙыу

**ИЗРЕЖЁННЫЙ** и **ИЗРЕ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изреди́ть 2.** *прил.*; *с.-х.* (үтә) һирәк, һирәк сәселгән (шытып сыҡҡан); **изрежённые всхо́ды свёклы** сөгөлдөрҙөң үтә һирәк шытымы; **изре́женный лес** үтә һирәк урман

**ИЗРЕ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **изреди́ть**

**ИЗРЕ́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изре́зать 2.** *прил.* (*неровный*) йыртылланған, йыртылланып бөткән; **изре́занная ме́стность** йыртылланып бөткән урын

**ИЗРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* тураҡлап (турап, киҫкеләп) бөтөрөү; **изре́зать мате́рию** тауарҙы киҫкеләп бөтөрөү **2.** *кого-что* телгеләү, телгеләп (ҡырҡҡылап) бөтөрөү; **изре́зать но́ги о ка́мни** аяҡты ташҡа телгеләп бөтөрөү **3.** *что* йыртылау, йыртылап бөтөрөү; **во́лны изре́зали бе́рег** тулҡын ярҙы йыртылап бөтөргән

**ИЗРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йәрәхәтләнеү, телгеләнеү, киҫелеү; **изре́заться стёклами** быялаға киҫелеү

**ИЗРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **изре́зать**

**ИЗРЕКА́ТЬ** *несов. см.* **изре́чь**

**ИЗРЕЧЕ́НИЕ** *с* хикмәтле (тәрән мәғәнәле) һүҙ, әйткән һүҙ; **изрече́ния вели́ких люде́й** бөйөк кешеләрҙең тәрән мәғәнәле һүҙҙәре

**ИЗРЕ́ЧЬ** *сов. что* и *без доп.*; *уст., трад.-поэт.* һөйләп (әйтеп) биреү; **изре́чь и́стину** дөрөҫлөктө әйтеп биреү

**ИЗРЕШЕТИ́ТЬ** *сов. кого-что* тишкеләп (селтәрләп) бөтөрөү; **изрешети́ть пу́лями** пуляләр менән тишкеләп бөтөрөү

**ИЗРЕШЕТИ́ТЬСЯ** *сов.* тишкеләнеп (селтәрләнеп) бөтөү

**ИЗРУБА́ТЬ** *несов. см.* **изруби́ть**

**ИЗРУБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тураҡлау, тураҡлап бөтөрөү, тапау; **изруби́ть на дрова́** утынға тураҡлау; **изруби́ть мя́со на котле́ты** котлетҡа ит тапау **2.** *кого* (*убить*) ҡырып (турап) бөтөрөү; **изруби́ть врага́** дошманды ҡырып бөтөрөү

**ИЗРУГА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ныҡ (һүгеп) әрләп ташлау, эт итеп һүгеү

**ИЗРУГА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һүгенеү, әрләшеү

**ИЗРЫГА́ТЬ** *несов. что* **1.** кикереү, кикереп ебәреү **2.** *перен.* сәсеү; **пу́шки изрыга́ли дым и пла́мень** пушкалар ялҡын һәм төтөн сәсә ине **3.** *перен.* яуҙырыу; **изрыга́ть прокля́тье** ҡарғыш яуҙырыу

**ИЗРЫГНУ́ТЬ** *сов. см.* **изрыга́ть**

**ИЗРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изры́ть 2.** *прил.* ҡаҙылып (аҡтарылып) бөткән; **изры́тая доро́га** аҡтарылып бөткән юл

**ИЗРЫ́ТЬ** *сов. что* ҡаҙып (соҡоп) бөтөрөү, аҡтарып ташлау; **снаря́ды изры́ли по́ле** снарядтар яланды аҡтарып ташланы

**ИЗРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *уст.* яҡшы, һәйбәт; **изря́дная подгото́вка** яҡшы әҙерлек; **изря́дное воспита́ние** һәйбәт тәрбиә **2.** байтаҡ, шаҡтай, арыу ғына, күп кенә; **изря́дная су́мма де́нег** байтаҡ аҡса; **там изря́дная ску́ка** унда шаҡтай күңелһеҙ

**ИЗУВЕ́Р** *м* **1.** (*фанатик*) изувер **2.** яуыз, ҡанһыҙ (рәхимһеҙ) кеше; **фаши́стские изуве́ры** фашист яуыздары

**ИЗУВЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое рәхимһеҙ, аяуһыҙ, ҡанһыҙ, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ; **изуве́рские пы́тки** аяуһыҙ яза

**ИЗУВЕ́РСТВО** *с* **1.** (*фанатизм*) изуверлыҡ, дини фанатиклыҡ **2.** үтә ҡанһыҙлыҡ, яуыздарса ҡыланыш

**ИЗУВЕ́РСТВОВАТЬ** *несов.* яуыздарса ҡыланыу (эш итеү)

**ИЗУВЕ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изуве́чить 2.** *прил.* имгәтелгән, зәғифләндерелгән, имгәнгән, зәғифләнгән; **изуве́ченный бое́ц** зәғифләнгән һалдат **3.** *прил.* (*о вещах, предме-*

*тах*) эштән сығарылған; **изуве́ченные пу́шки** эштән сыҡҡан пушкалар **4.** *в знач. сущ.* **изуве́ченный** *м* и **изуве́ченная** *ж* зәғиф, ғәрип (*кеше*)

**ИЗУВЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **изуве́чить**

**ИЗУВЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **изуве́читься 2.** *страд. от* **изуве́чивать**

**ИЗУВЕ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*искалечить*) зәғифләү, имгәтеү; **его́ но́гу изуве́чило оско́лком снаря́да** аяғын снаряд ярсығы зәғифләгән **2.** (*привести в негодность, исковеркать*) эштән сығарыу, боҙоу, боҙоп ташлау

**ИЗУВЕ́ЧИТЬСЯ** *сов.* зәғифләнеү, зәғифләнеп (имгәнеп) бөтөү

**ИЗУКРА́СИТЬ** *сов. кого-что* **1.** биҙәү, биҙәкләү; **изукра́сить зда́ние фла́гами** йортто флагтар менән биҙәү **2.** *разг.* бысратып (йәмһеҙләп) бөтөрөү; **изукра́сил лицо́ са́жей** битен ҡором менән бысратып бөткән **3.** *разг., ирон.* (*избить до синяков*) биҙәү, матурлау; **кто тебя́ так изукра́сил?** кем һине шулай матурланы?

**ИЗУКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **изукра́сить**

**ИЗУМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иҫ киткес, һоҡланғыс, һоҡландырғыс, таң ҡалырлыҡ; **изуми́тельный рома́н** һоҡландырғыс роман; **изуми́тельный тала́нт** һоҡланғыс талант

**ИЗУМИ́ТЬ** *сов. кого-что* таң ҡалдырыу, шаҡ ҡатырыу, һоҡландырыу; **изуми́ть игро́й на скри́пке** скрипкала уйнауы менән һоҡландырыу

**ИЗУМИ́ТЬСЯ** *сов.* таң (хайран) ҡалыу, һоҡланыу, иҫ китеү

**ИЗУМЛЕ́НИЕ** *с* таң (хайран) ҡалыу, шаҡ ҡатыу; **прийти́ в изумле́ние** таң ҡалыу

**ИЗУМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изуми́ть 2.** *прил.* аптыраған, иҫе киткән; **изумлённый вид** аптыраған ҡиәфәт

**ИЗУМРУ́Д** *м* зөбәржәт; **пе́рстень с изумру́дом** зөбәржәт ҡашлы йөҙөк

**ИЗУМРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** зөбәржәт ...ы; **изумру́дные ко́пи** зөбәржәт копиҙәре **2.** зөбәржәтле, зөбәржәт ҡашлы; **изумру́дный пе́рстень** зөбәржәт ҡашлы йөҙөк **3.** (*о цвете*) зөбәржәт төҫлө, асыҡ йәшел; **изумру́дная зе́лень** асыҡ йәшел үлән

**ИЗУРО́ДОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изуро́довать 2.** *прил.* йәмһеҙләнеп (ғәрипләнеп, имгәнеп) бөткән; **изуро́дованное лицо́** йәмһеҙләнеп бөткән йөҙ; **изуро́дованная рука́** имгәнеп бөткән ҡул **3.** *прил.* ҡыйралған, эштән сыҡҡан, яраҡһыҙ хәлгә килгән, боҙолған, ватылған, емерелгән, ҡыйралып боҙолған; **изуро́дованный танк** ҡыйралған танк; **изуро́дованный кора́бль** эштән сыҡҡан карап

**ИЗУРО́ДОВАТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*искалечить, изувечить*) ғәрипләү, имгәтеү **2.** ныҡ йәмһеҙләү; **о́спа изуро́дует лицо́** сәсәк битте йәмһеҙләй **3.** ватып (емереп, аҡтарып, боҙоп) бөтөрөү (ташлау); **снаря́ды изуро́довали зе́млю** снарядтар ерҙе аҡтарып ташлаған **4.** *перен.* (*исказить, испортить*) боҙоу, үҙгәртеү, боҙоп күрһәтеү; **изуро́довать мысль** фекерҙе боҙоп күрһәтеү

**ИЗУРО́ДОВАТЬСЯ** *сов.* **1.** имгәнеү, ғәрипләнеү **2.** *перен.* боҙолоу, үҙгәреү

**ИЗУ́СТНЫЙ,** -ая, -ое телдән, телдән һөйләнә торған, телдән-телгә күскән; **изу́стное преда́ние** телдән-телгә күскән риүәйәт

**ИЗУЧА́ТЬ** *несов. см.* **изучи́ть**

**ИЗУЧЕ́НИЕ** *с см.* **изучи́ть** — **изуча́ть**; **изуче́ние языко́в** телдәр өйрәнеү; **изуче́ние приро́ды** тәбиғәтте өйрәнеү

**ИЗУ́ЧЕННОСТЬ** *ж* өйрәнелеү, тикшерелеү; **ма́лая изу́ченность явле́ния** күренештең аҙ өйрәнелгән булыуы

**ИЗУ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изучи́ть 2.** *прил.* билдәле (таныш, өйрәнелгән) булған; **изу́ченный материа́л** билдәле булған материал

**ИЗУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** өйрәнеү; **изучи́ть иностра́нный язы́к** сит тел өйрәнеү; **изучи́ть о́пыт** тәжрибә өйрәнеү **2.** өйрәнеү, тикшереү; **изучи́ть дре́внюю ру́копись** боронғо ҡулъяҙманы тикшереү; **изучи́ть наро́дное тво́рчество** халыҡ ижадын өйрәнеү; **изучи́ть обстано́вку** хәлде тикшереү; **изучи́ть ме́стность** урынды өйрәнеү; **изучи́ть хара́ктер това́рища** иптәшеңдең холҡон өйрәнеү

**ИЗЪ...** *приставка см.* **из...**

**ИЗЪЕДА́ТЬ** *несов. см.* **изъе́сть**

**ИЗЪЕ́ЗДИТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** йөрөп (гиҙеп, ҡыҙырып) сығыу; **изъе́здить всю страну́** бөтә илде йөрөп сығыу **2.** (*испортить, повредить ездой*) йөрөп боҙоп (йығылап) бөтөрөү; **изъе́здить доро́гу** юлды йөрөп боҙоп бөтөрөү

**ИЗЪЕ́ЗЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изъе́здить 2.** *прил.* күп йөрөүҙән боҙолған; **изъе́зженная доро́га** күп йөрөүҙән боҙолған юл

**ИЗЪЕ́СТЬ** *сов. что.* **1.** ҡырҡып (киҫеп, ашап) бөтөрөү; **моль изъе́ла сукно́** буҫтауҙы көйә ҡырҡып бөтөргән **2.** (*о едких веществах*) яндырыу, ашау, киҫеү; **кислота́ изъе́ла ткань** туҡыманы кислота яндырған

**ИЗЪЯВИ́ТЕЛЬНЫЙ: изъяви́тельное наклоне́ние** *грам.* хәбәр һөйкәлеше

**ИЗЪЯВИ́ТЬ** *сов. что* белдереү, әйтеү; **изъяви́ть своё жела́ние** үҙ теләгеңде әйтеү; **изъяви́ть согла́сие** ризалыҡ белдереү

**ИЗЪЯВЛЕ́НИЕ** *с см.* **изъявля́ть**; **изъявле́ние благода́рности** рәхмәт әйтеү

**ИЗЪЯВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **изъяви́ть**

**ИЗЪЯ́Н** *м* етешһеҙлек, кәмселек, ғәйеп, зыян; **това́р с изъя́ном** кәмселекле тауар

**ИЗЪЯСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* һөйләшеү, һөйләшә белеү; **хорошо́ изъясня́ться по-англи́йски** инглизсә яҡшы һөйләшеү

**ИЗЪЯ́ТИЕ** *с см.* **изъя́ть**

**ИЗЪЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** алыу, алып ташлау, ҡулланыуҙан (көсөнән) сығарыу; **изъя́ть кни́гу**

**из прода́жи** китапты һатыуҙан алыу **2.** тартып алыу; **изъя́ть докуме́нты** документтарҙы тартып алыу

**ИЗЫМА́ТЬ** *несов. см.* **изъя́ть**

**ИЗЫСКА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **изыска́ть**; **изыска́ние дополни́тельных средств** өҫтәмә саралар табыу **2.** *обычно мн.* **изыска́ния** тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр; **геологи́ческие изыска́ния** геологик эҙләнеүҙәр

**ИЗЫ́СКАННОСТЬ** *ж* ҡупшылыҡ, нәфислек, нескәлек, нәзәкәтлелек; **изы́сканность наря́да** кейемдең ҡупшылығы

**ИЗЫ́СКАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **изыска́ть** **2.** *прил.* нәфис, нескә, ҡупшы, нәзәкәтле; **изы́сканный наря́д** ҡупшы кейем

**ИЗЫСКА́ТЕЛЬ** *м* эҙләнеүсе, тикшеренеүсе; **инжене́р-изыска́тель** инженер-тикшеренеүсе

**ИЗЫСКА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое эҙләнеүсе …ы, тикшеренеүсе …ы; **изыска́тельская па́ртия** тикшеренеүселәр партияһы

**ИЗЫСКА́ТЬ** *сов. что*; *книжн.* эҙләп (эҙләнеп, тикшеренеп) табыу; **изыска́ть сре́дства** саралар эҙләп табыу

**ИЗЫСКА́ТЬСЯ** *сов*; *книжн.* (эҙләп) табылыу; **изыска́лись но́вые исто́чники** яңы сығанаҡтар табылды

**ИЗЫ́СКИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **изыска́ть** **2.** *что* (*производить исследования*) тикшеренеү, эҙләнеү; **изы́скивать но́вые ме́тоды** яңы алымдар эҙләнеү

**ИЗЮ́БР** *м* изюбр (*болан төрө*)

**ИЗЮ́М** *м* йөҙөм; **бу́лочка с изю́мом** йөҙөмлө күмәс

**ИЗЮ́МИНА** *ж*; *разг.* бер бөртөк йөҙөм, йөҙөм бөртөгө

**ИЗЮ́МИНКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **изю́мина** **2.** *перен.* үҙенсәлек, һөйкөмлөлөк; **челове́к с изю́минкой** (үҙенә тартып торған) һөйкөмлө кеше

**ИЗЮ́МНЫЙ,** -ая, -ое йөҙөм …ы, йөҙөмдән; **изю́мный вкус** йөҙөм тәме; **изю́мное вино́** йөҙөм шарабы

**ИЗЯ́ЩЕСТВО** *с* нәфислек, матурлыҡ, зифалыҡ; **изя́щество рису́нка** һүрәттең нәфислеге; **вне́шнее изя́щество** тышҡы нәфислек

**ИЗЯ́ЩНЫЙ,** -ая, -ое **1.** нәфис, матур, зифа, күркәм; **изя́щное пла́тье** матур күлдәк; **изя́щная фигу́ра** зифа буй **2.** *в знач. сущ.* **изя́щное** *с* матурлыҡ, нәфислек, зифалыҡ, күркәмлек ♦ **изя́щные иску́сства** *уст.* нәфис сәнғәт (*рәсем сәнғәте, һынлы сәнғәт, музыка*)

**ИКА́НИЕ** *с* осҡолоҡ тотоу, тамаҡ саҡырыу, сиҡаҡлау, сиҡылдау

**ИКА́ТЬ** *несов.* осҡолоҡ тотоу, тамаҡ саҡырыу, осҡолоҡлау, сиҡаҡлау, сиҡылдау; **ика́ть от холо́дной воды́** һыуыҡ һыуҙан сиҡаҡлау; **ребёнок ика́ет** баланың тамағы саҡыра

**ИКА́ТЬСЯ** *несов. кому безл.*; *разг.* сиҡаҡлатыу, сиҡылдатыу; **мне что́-то ика́ется** нишләптер сиҡаҡлата

**ИКО́НА** *ж* тәре, икона; **крести́ться пе́ред ико́ной** тәре алдында суҡыныу

**ИКО́ТА** *ж* осҡолоҡ, сиҡаҡ

**ИКРА́ I** *ж* **1.** ыуылдырыҡ; **зерни́стая икра́** бөртөклө ыуылдырыҡ; **ке́товая икра́** кета ыуылдырығы; **кра́сная икра́** ҡыҙыл ыуылдырыҡ; **осетро́вая икра́** бикре ыуылдырығы; **мета́ние икры́** ыуылдырыҡ сәсеү **2.** (*кушанье из овощей*) икра; **баклажа́нная икра́** баклажан икраһы

**ИКРА́ II** *ж см.* **и́кры**

**ИКРИ́НКА** *ж* ыуылдырыҡ бөртөгө

**ИКРИ́СТЫЙ,** -ая, -ое (күп) ыуылдырыҡлы; **икри́стая щу́ка** ыуылдырыҡлы суртан

**ИКРОМЕТА́НИЕ** *с* ыуылдырыҡ сәсеү

**И́КРЫ** *мн.* (*ед.* **икра́** *ж*) балтыр, балтыр ите

**ИКРЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** ыуылдырыҡлы; **икряна́я ры́ба** ыуылдырыҡлы балыҡ **2.** ыуылдырыҡ …ы; **икряно́й бочо́нок** ыуылдырыҡ мискәһе

**ИКС** *м* икс (**1.** *латин алфавитында аҙаҡтан өсөнсө хәреф* **2.** *мат. шул хәреф менән күрһәтелгән билдәһеҙ дәүмәл*)

**ИЛ** *м* ләм, мәте; **целе́бный ил** шифалы ләм; **изма́заться и́лом** ләмгә буялыу; **оседа́ние и́ла** ләм ултырыу

**И́ЛИ** и *разг.* **ИЛЬ** *союз* **1.** *разд.* (*употребляется при сопоставлении предложений или отдельных членов предложения*) йәки, йә; **сего́дня и́ли за́втра** бөгөн йәки иртәгә

**2.** *разд.-перечислит.* (*объединяет предложения или отдельные члены предложения при перечислении*) йә; **и́ли ко́фе, и́ли чай** йә ҡәһүә, йә сәй

**3.** *присоед.* (*при перечислении употребляется для присоединения последних членов перечисления*) йә, йә булмаһа; **поищи́ в шкафу́ и́ли на по́лке** шкафтан, йә булмаһа кәштәнән эҙлә

**4.** *противит.* (*указывает на взаимосвязь действий, по значению соответствует словам “иначе”, “в противном случае”*) юҡһа, юғиһә; **уйми́сь, и́ли ху́до бу́дет** тыныслан, юғиһә, насар булыр

**5.** *поясн.* (*употребляется при введении вставных слов, по значению соответствует словам “то есть”, “иными словами”*) йәғни, икенсе төрлө әйткәндә; **педаго́г, и́ли учи́тель** педагог, йәғни уҡытыусы

**6.** *вопр.*; *разг.* (*в вопр. предложениях в значении “разве?”, “неужели?”, “может быть?”*) әллә; **и́ли ты не слыха́л об э́том?** әллә һин был турала ишетмәнеңме?

**И́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое ләмле, мәтеле; **и́листая по́чва** мәтеле тупраҡ; **и́листый пруд** ләмле быуа

**ИЛЛЮЗИОНИ́СТ** *м*; *цирк.* иллюзионист (*артист*); **выступле́ние иллюзиони́ста** иллюзионист сығышы



14 зак. 2.0084.05

**ИЛЛЮ́ЗИЯ** *ж* иллюзия (**1.** *тойғоноң алдауы нигеҙендә ысынбарлыкты боҙоп күҙ алдына килтереү* **2.** *тормошҡа ашмай торған өмөт, хыял*); **иллю́зия движе́ния** хәрәкәт иллюзияһы; **предава́ться иллю́зиям** иллюзияға бирелеү

**ИЛЛЮЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое хыялдағы, тормошҡа ашмай торған, буш; **иллюзо́рные наде́жды** хыялдағы өмөттәр; **иллюзо́рные результа́ты** тормошҡа ашмай торған һөҙөмтәләр

**ИЛЛЮМИНА́ТОР I** *м* иллюминатор (*карапта, самолётта һ.б. түңәрәк тәҙрә*); **бортовы́е иллюмина́торы** борт иллюминаторҙары

**ИЛЛЮМИНА́ТОР II** *м* иллюминация белгесе

**ИЛЛЮМИНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое иллюминация ...ы; **иллюминацио́нные огни́** иллюминация уттары

**ИЛЛЮМИНА́ЦИЯ** *ж* иллюминация (*байрамдарҙа урамдарҙы, йорттарҙы яҡтыртыу, биҙәү*); **пра́здничная иллюмина́ция** байрам иллюминацияһы; **разноцве́тная иллюмина́ция** төрлө төҫтәге иллюминация

**ИЛЛЮМИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* иллюминациялау, иллюминация яһау; **иллюмини́ровать го́род** ҡаланы иллюминациялау

**ИЛЛЮСТРАТИ́ВНОСТЬ** *ж* иллюстративлыҡ, күргәҙмәлелек

**ИЛЛЮСТРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое иллюстратив, күргәҙмә; **иллюстрати́вный ме́тод** күргәҙмә ысул; **иллюстрати́вный материа́л** күргәҙмә материал

**ИЛЛЮСТРА́ТОР** *м* иллюстратор (*тексҡа һүрәттәр эшләүсе рәссам*)

**ИЛЛЮСТРА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **иллюстри́рование** **2.** иллюстрация, һүрәт; **кни́га с иллюстра́циями** иллюстрациялы (һүрәтле) китап

**ИЛЛЮСТРИ́РОВАНИЕ** *с см.* **иллюстри́ровать**

**ИЛЛЮСТРИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **иллюстри́ровать** **2.** *прил.* иллюстрациялы; **иллюстри́рованный журна́л** иллюстрациялы журнал

**ИЛЛЮСТРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** иллюстрациялау; **иллюстри́ровать кни́гу** китапты иллюстрациялау **2.** *перен.* аңлатыу (*үрнәктәр күрһәтеп*); **иллюстри́ровать свою́ мысль приме́ром** үҙ фекереңде миҫалдар менән аңлатыу

**И́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **и́листый**; **и́ловое дно реки́** йылғаның ләмле төбө

**ИЛО́Т** *м* **1.** илот (*Боронғо Спартала хөкүмәт милке иҫәпләнгән ерҙе эшкәртеүсе*) **2.** *перен., книжн.* ҡол

**ИЛЬ** *союз.*; *разг. см.* **и́ли**

**И́ЛЬКА** *ж* илька (*йәнлек һәм уның тиреһе*)

**ИЛЬМ** *м* йыла; **го́рный ильм** тау йылаһы

**ИЛЬМЕ́НЬ** и **И́ЛЬМЕНЬ** *м* бәләкәй күл

**И́ЛЬМОВНИК** *м* йылалыҡ

**И́ЛЬМОВЫЙ,** -ая, -ое йыла ...ы; **и́льмовая кора́** йыла ҡабығы

**ИМАЖИНИ́ЗМ** *м* имажинизм (*сәнғәттең идеялылығын инҡар иткән ағым*)

**ИМАЖИНИ́СТ** *м* имажинист

**ИМА́М** *м* имам (**1.** *мосолмандарҙың дин башлығы* **2.** *ҡайһы бер мосолман илдәрендә дәүләт башында тороусы* **3.** *мәсеттәге дин әһеле*)

**ИМБИ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** имбир ...ы; **имби́рные ли́стья** имбир япраҡтары; **имби́рное ма́сло** имбир майы **2.** имбирлы; **имби́рные пря́ники** имбирлы перәниктәр

**ИМБИ́РЬ** *м* имбир (**1.** *тамыры эфир майҙарына бай тропик үҫемлек* **2.** *уның тамырынан эшләнгән тәмләткес*)

**ИМЕ́НИЕ** *с* имение (*алпауыт хужалығы*)

**ИМЕНИ́ННИК** *м* и **ИМЕНИ́ННИЦА** *ж* тыуған көнөн туйлаған кеше ♦ **сиде́ть как имени́нник** тыуған көнөн туйлағандай тик ултырыу

**ИМЕНИ́НЫ** *только мн.* исем туйы (*православие һәм католик динендәгеләрҙә*)

**ИМЕНИ́ТЕЛЬНЫЙ: имени́тельный паде́ж** *грам.* төп килеш

**ИМЕНИ́ТЫЙ,** -ая, -ое атаҡлы, танылған, оло, ҙур; **имени́тый гость** ҙур ҡунаҡ

**И́МЕННО** *частица* **1.** (*при указании на какой-л. член предложения*) тап, нәҡ, һуң; **кто и́менно** кем һуң; **э́то и́менно он** был нәҡ ул **2.** (*при уточняющих членах предложения*) атап әйткәндә, йәғни; **ли́ственные дере́вья, а и́менно дуб, берёза, оси́на** япраҡлы ағастар, йәғни имән, ҡайын, уҫаҡ

**ИМЕННО́Й,** -ая, -ое **1.** исемле, исеме ҡуйылған; **именно́е кольцо́** исеме ҡуйылған балдаҡ; **именны́е часы́** исемле сәғәт **2.** *грам.* исем; **именно́е склоне́ние** исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше ♦ **именно́й спи́сок** исемлек (*исем һәм фамилиялар күрһәтеп төҙөлгән исемлек*)

**ИМЕНОВА́ТЬ** *несов. кого-что* атау, исемләү, исем ҡушыу (биреү)

**ИМЕНОВА́ТЬСЯ** *несов.* аталыу, исемләнеү

**ИМЕ́ТЬ** *несов. кого-что*; *в разн. знач.* (*обладать, располагать кем-чем-л.*) эйә, эйә булыу, бар, булыу, -лы/-ле булыу; (*с отрицанием*) юҡ, булмау; **име́ть де́ньги** аҡсалы булыу; **име́ть значе́ние** әһәмиәте бар; **име́ть при себе́ па́спорт** паспорттың үҙең менән булыуы; **ко́мната име́ет одно́ окно́** бүлмәнең бер тәҙрәһе бар; **он име́ет дете́й** уның балалары бар; **ты име́ешь возмо́жность** һинең мөмкинлегең бар; **не име́ю вре́мени** ваҡытым юҡ ♦ **име́ть в виду́** *кого-что* иҫтә тотоу; **име́ть го́лову на плеча́х** аҡыллы булыу, аҡыл менән эш итә белеү; **име́ть де́ло** *с кем-чем* эш итеү; **име́ть зуб на (про́тив)** *кого берәйһенә* асыу тотоу, үс һаҡлау; **име́ть ме́сто** ғәмәлдә булыу, урын алыу

**ИМЕ́ТЬСЯ** *несов.* бар (булыу); (*с отрицанием*) юҡ; **име́ются но́вые све́дения** яңы мәғлүмәттәр бар; **препя́тствий не име́ется** ҡар-

шылыҡтар юҡ ♦ **име́ться в виду́** күҙ уңында булыу

**ИМИТА́ТОР** *м* имитатор (**1.** *берәйһенең һөйләүен, йәнлек, ҡош тауышын оҫта ҡабатлаусы* **2.** *ниндәйҙер приборҙың, ҡоролманың кесерләһе*); **имита́тор каби́ны косми́ческого корабля́** йыһан карабының кабина имитаторы

**ИМИТА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **имити́ровать 2.** (*подделка*) оҡшатып яһалған (нәмә); **имита́ция же́мчуга** ынйыға оҡшатып яһалған **3.** *муз.* имитация (*музыкаль әҫәрҙе икенсе тауышта ҡабатлау*)

**ИМИТИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* оҡшатып (булып, үсекләп) һөйләү (ҡысҡырыу, һайрау, ҡыланыу); **имити́ровать пе́ние соловья́** һандуғас булып һайрау **2.** *что* оҡшатып яһау (эшләү); **имити́ровать зо́лото** алтынға оҡшатып яһау **3.** *муз.* имитациялау (*музыкаль әҫәрҙе икенсе тауышта ҡабатлау*)

**ИММАНЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* имманент, эске (*әйберҙең эске тәбиғәтенә хас булған*); **иммане́нтные зако́ны произво́дства** етештереүҙең эске закондары (ҡанундары); **иммане́нтная причи́на** имманент (эске) сәбәп

**ИММИ́ГРАНТ** *м* и **ИММИГРА́НТКА** *ж* иммигрант (*даими йәшәү өсөн килеүсе сит ил кешеһе*); **стать иммигра́нтом** иммигрант булып китеү

**ИММИГРА́НТСКИЙ,** -ая, -ое иммигрантлыҡ; **иммигра́нтские права́** иммигрантлыҡ хоҡуҡтары

**ИММИГРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое иммиграция ...ы; **иммиграцио́нные зако́ны** иммиграция закондары (ҡанундары)

**ИММИГРА́ЦИЯ** *ж* **1.** иммиграция; **жить в иммигра́ции** иммиграцияла йәшәү **2.** *собир.* иммигранттар

**ИММИГРИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* сит илгә күсеп килеү, иммиграцияға китеү

**ИММОРТЕ́ЛЬ** *ж* үлмәҫгөл

**ИММУНИЗА́ЦИЯ** *ж*; *мед. см.* **иммунизи́ровать**

**ИММУНИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что-л.*; *мед.* иммунизациялау, иммунитет булдырыу; **иммунизи́ровать органи́зм** организмда иммунитет булдырыу

**ИММУНИТЕ́Т** *м* иммунитет (**1.** *мед. организмдың йоғошло ауырыуҙарға бирешмәүе* **2.** *юр. дәүләт хеҙмәтендәге билдәле бер кешеләргә ҡайһы бер закондарҙың ҡағылмауы*); **врождённый иммуните́т** тыумыштан булған иммунитет; **приобретённый иммуните́т** булдырылған иммунитет; **дипломати́ческий иммуните́т** дипломаттар иммунитеты

**ИММУ́ННЫЙ,** -ая, -ое *мед.*, *биол.* иммунитетлы, ағыуға бирешмәү(сән); **имму́нные сво́йства живо́тных** хайуандарҙың ағыуға бирешмәү үҙенсәлектәре

**ИММУНОЛО́ГИЯ** *ж* иммунология (*организмдың йоғошло ауырыуҙарға бирешмәүе тураһындағы фән*); **занима́ться иммуноло́гией** иммунология менән шөғөлләнеү

**ИМПЕРАТИ́В** *м* **1.** *книжн.* (*повеление*) бойороҡ, ҡәтғи талап; **нра́вственный императи́в** ҡәтғи рухи талап **2.** *грам.* бойороҡ ҡылым

**ИМПЕРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* ҡәтғи; **императи́вное указа́ние** ҡәтғи күрһәтмә; **императи́вный тон** ҡәтғи тон

**ИМПЕРА́ТОР** *м* император

**ИМПЕРА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое император ...ы; **импера́торский дворе́ц** император һарайы; **импера́торский ти́тул** император титулы

**ИМПЕРАТРИ́ЦА** *ж* **1.** (*жена императора*) император ҡатыны **2.** (*титул*) император ҡатын

**ИМПЕРИАЛИ́ЗМ** *м* империализм

**ИМПЕРАЛИ́СТ** *м* империалист

**ИМПЕРИАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое империалистик; **империалисти́ческая война́** империалистик һуғыш; **империалисти́ческие стра́ны** империалистик илдәр; **империалисти́ческие противоре́чия** империалистик ҡаршылыҡтар

**ИМПЕ́РИЯ** *ж* империя (**1.** *башында император торған монархия дәүләте* **2.** *эре империалистик колониаль дәүләт*); **вели́кая импе́рия** бөйөк империя

**ИМПЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое империя ...ы; **импе́рская а́рмия** империя армияһы; **импе́рский герб** империя гербы

**ИМПОЗА́НТНОСТЬ** *ж* мөһабәтлек, күркәмлек

**ИМПОЗА́НТНЫЙ,** -ая, -ое мөһабәт, күркәм; **импоза́нтная вне́шность** күркәм ҡиәфәт

**ИМПОНИ́РОВАТЬ** *несов. кому-чему* и *без доп.* яҡшы ҡараш тыуҙырыу, йәлеп итеү, хөрмәт (ихтирам) уятыу; **импони́ровать свои́м слу́шателям** тыңлаусыларҙа үҙенә ҡарата хөрмәт уятыу

**И́МПОРТ** *м* импорт; **гото́вить на и́мпорт** импортҡа әҙерләү

**ИМПОРТЁР** *м*; *спец.* импортёр

**ИМПОРТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* сит илдән (тауар) индереү

**И́МПОРТНЫЙ,** -ая, -ое импорт ...ы, сит илдән индерелгән; **и́мпортный това́р** импорт тауары, сит илдән индерелгән тауар

**ИМПОТЕ́НТ** *м*; *мед.* импотент

**ИМПОТЕ́НЦИЯ** *ж*; *физиол.* импотенция (*ирҙәрҙәге енси көсһеҙлөк*)

**ИМПРЕСА́РИО** *м нескл.* импресарио (*концерттар, төрлө тамашалар ойоштороусы артист-эшҡыуар*)

**ИМПРЕССИОНИ́ЗМ** *м* импрессионизм (*XIX б. урталарында әҙәбиәттә һәм сәнғәттә ижадсының нескә шәхси тойғоларын сағылдырған йүнәлеш*)

**ИМПРЕССИОНИ́СТ** *м* импрессионист (*импрессионизм йүнәлешенән барыусы*)

**ИМПРЕССИОНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое импрессионистик; **импрессионисти́ческая му́зыка** импрессионистик музыка

**ИМПРЕССИОНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое импрессионизм ...ы; **импрессиони́стские тенде́нции в литерату́ре** әҙәбиәттә импрессионизм тенденциялары

**ИМПРОВИЗА́ТОР** *м* импровизатор, сәсән; **быть импровиза́тором** сәсән булыу

**ИМПРОВИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое сәсәнлек ...ы, импровизаторлыҡ ...ы; **импровиза́торский тала́нт** сәсәнлек таланты

**ИМПРОВИЗА́ТОРСТВО** *с* сәсәнлек, импровизаторлыҡ; **быть иску́сным в импровиза́торстве** сәсәнлектә маһир булыу

**ИМПРОВИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **импровизи́ровать 2.** импровизация (*алдан әҙерләнмәйенсә башҡарыу, уйлап сығарылған шиғыр, көй*); **блестя́щая импровиза́ция** бик шәп импровизация

**ИМПРОВИЗИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **импровизи́ровать 2.** *прил.* алдан әҙерләнмәгән, тиҙ генә әҙерләнгән, әле генә уйланылған; **импровизи́рованный ве́чер** тиҙ генә әҙерләнгән кисә

**ИМПРОВИЗИ́РОВАТЬ 1.** *несов. что* и *без доп.* импровизациялау, импровизация яһау, сәсәнлек итеү; **ма́стерски импровизи́ровать** оҫта импровизациялау **2.** *несов.* (*выдумывать, сочинять*) уйлап сығарыу **3.** *сов.*; *перен.* әҙерлекһеҙ, тиҙ генә уйлап сығарыу (әҙерләү, эшләү); **импровизи́ровать обе́д** тиҙ генә төшкө аш әҙерләү

**И́МПУЛЬС** *м* импульс (**1.** *ниндәй ҙә булһа эшкә дәртләндереүсе көс* **2.** *физиол. нервы уяҡтыстарының эшмәкәрлеге арҡаһында барлыҡҡа килгән ирекһеҙ хәрәкәт*); **дава́ть и́мпульс** импульс биреү; **и́мпульс к тво́рчеству** ижадҡа импульс ♦ **не́рвный и́мпульс** *физиол.* нервы импульсы; **электри́ческий и́мпульс** *эл., радио.* электр импульсы

**ИМПУЛЬСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** импульсив, ирекһеҙҙән яһалған; **импульси́вные де́йствия** импульсив хәрәкәттәр **2.** импульсив, артыҡ хәрәкәтсән; **импульси́вный челове́к** артыҡ хәрәкәтсән кеше

**И́МПУЛЬСНЫЙ,** -ая, -ое *эл., радио.* импульслы; **и́мпульсный генера́тор** импульслы генератор; **и́мпульсная радиосвя́зь** импульслы радиоэлемтә

**ИМУ́ЩЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое мөлкәт ...ы, милек ...ы; **иму́щественная отве́тственность** милек яуаплылығы; **иму́щественные отноше́ния** мөлкәт бәйләнештәре

**ИМУ́ЩЕСТВО** *с* милек, мөлкәт; **нака́пливать иму́щество** мөлкәт йыйыу; **разде́л иму́щества** мөлкәт бүлеү; **госуда́рственное иму́щество** дәүләт милке; **дви́жимое иму́щество** күсмә милек (*мал һ.б.*)

**ИМУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** мал-мөлкәтле, хәлле, бай **2.** *в знач. сущ.* **иму́щие** *мн.* байҙар ♦ **власть иму́щие** власть башында тороусылар, хакимдар

**И́МЯ** *с* **1.** исем, ат; **как его́ и́мя?** уның исеме кем (нисек)?; **на и́мя до́чери** ҡыҙы исеменә; **написа́ть заявле́ние на и́мя дире́ктора** директор исеменә ғариза яҙыу; **по и́мени** исемле **2.** ат, исем, дан, шөһрәт; **до́брое и́мя** яҡшы ат; **дорожи́ть до́брым и́менем** яҡшы исемгә тап төшөрмәү **3.** *грам.* **и́мя существи́тельное** исем; **и́мя прилага́тельное** сифат; **и́мя числи́тельное** һан ♦ **и́мени** *кого-чего* исемендәге; **Башки́рский госуда́рственный академи́ческий анса́мбль наро́дного та́нца и́мени Файзи́ Гаска́рова** Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле; **во и́мя** *кого-чего кемдер* (*нимәлер*) өсөн; **во и́мя дру́жбы** дуҫлыҡ хаҡына; **от и́мени** *кого* исеменән; **называ́ть ве́щи свои́ми имена́ми** дөрөҫөн һөйләү, тураһын әйтеү, әйберҙәрҙе үҙ исемдәре менән атау

**ИМЯРЕ́К** *м нескл.* исем (*берәйһенең исемен алыштырған һүҙ*)

**ИНАКОМЫ́СЛЯЩИЙ,** -ая, -ее башҡаса уйлаған (фекерләгән)

**ИНА́ЧЕ** и **И́НАЧЕ** *нареч.* **1.** башҡаса, икенсе төрлө; **смотре́ть не́сколько ина́че** икенсерәк ҡарау **2.** *в знач. противит. союза*; *разг.* юҡһа, юғиһә; **торопи́сь, ина́че не успе́ешь** ашыҡ, юғиһә өлгөрмәҫһең; **хорошо́, что есть ты, ина́че бы́ло бы ску́чно** әлдә һин бар, юҡһа күңелһеҙ булыр ине ♦ **так и́ли и́наче** *в знач. вводн. сл.* ҡайһылай булғанда ла, нисек кенә булмаһын; **так и́ли и́наче, я приду́** нисек кенә булмаһын, мин киләм

**ИНВАЛИ́Д** *м* инвалид, зәғиф, ғәрип; **инвали́д войны́** һуғыш инвалиды; **инвали́д труда́** хеҙмәт инвалиды

**ИНВАЛИ́ДНОСТЬ** *ж* инвалидлыҡ, зәғифлек, ғәриплек; **посо́бие по инвали́дности** инвалидлыҡ пособиеһы, инвалидлыҡ буйынса пособие

**ИНВАЛИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое инвалид ...ы; **инвали́дная коля́ска** инвалид коляскаһы

**ИНВЕНТАРИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*занесение в опись*) инвентаризация, инвентарь исемлегенә индереү **2.** (*проверка*) инвентаризация үткәреү (яһау); **производи́ть инвентариза́цию** инвентаризация үткәреү

**ИНВЕНТАРИЗИ́РОВАТЬ** и **ИНВЕНТАРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* инвентаризациялау, инвентаризация яһау (үткәреү), барлау, теүәлләү

**ИНВЕНТА́РНЫЙ,** -ая, -ое инвентарь ...ы; **инвента́рная кни́га** инвентарь кенәгәһе

**ИНВЕНТА́РЬ** *м* инвентарь, ҡорамал; **сельскохозя́йственный инвента́рь** ауыл хужалығы инвентары ♦ **живо́й инвента́рь** йәнле инвентарь (*эшселәр һәм йорт малы*); **мёртвый инвента́рь** хужалыҡ ҡорамалдары

**ИНВЕРСИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.*, *лит.* инверсияланған, инверсиялы; **инверси́рованная речь** инверсиялы телмәр

**ИНВЕ́РСИЯ** *ж*; *лингв.*, *лит.* инверсия (*һөйләмдә һүҙҙәр тәртибенең үҙгәреүе*)

**ИНВЕ́РТОР** *м*; *эл.* инвертор

**ИНВЕСТИ́РОВАНИЕ** *с*; *эк.* *см.* **инвести́ровать**

**ИНВЕСТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что*; *эк.* инвестициялау, капитал һалыу (*ил эсендәге йәки сит илдәге берәй предприятиеға килем алыу ниәте менән*)

**ИНВЕСТИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *эк.* инвестиция(лау) ...ы; **инвестицио́нный банк** инвестиция банкыһы

**ИНВЕСТИ́ЦИЯ** *см.* **инвести́рование**

**ИНВЕ́СТОР** *м*; *эк.* инвестор (*бер эшкә, кәсепкә капитал һалыусы кеше, ойошма йәки дәүләт*)

**ИНГАЛЯ́ТОР** *м* **1.** (*прибор*) ингалятор **2.** *см.* **ингалято́рий**

**ИНГАЛЯТО́РИЙ** *м* ингаляторий (*бина*)

**ИНГАЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *мед.* ингаляция (*пар, газ хәленә әйләндерелгән дарыу еҫкәтеп дауалау*); **де́лать ингаля́цию** ингаляция яһау

**ИНГРЕДИЕ́НТ** *м*; *спец.* ингредиент (*берәй ҡушылманың, ҡатнашманың бер өлөшө*)

**ИНГУШИ́** *мн.* ингуштар, ингуш халҡы // *ед.* **ингу́ш** *м* ингуш ир-аты; **ингу́шка** *ж* ингуш ҡатын-ҡыҙы

**ИНГУ́ШСКИЙ,** -ая, -ое ингуш ...ы; **ингу́шский язы́к** ингуш теле

**И́НДЕВЕТЬ** и **ИНДЕВЕ́ТЬ** *несов.* бәҫләнеү; **его́ бро́ви от моро́за и́ндевели** уның ҡаштары һыуыҡҡа бәҫләнгән

**ИНДЕ́ЙКА** *ж* **1.** инә күркә **2.** (*мясо*) күркә ите

**ИНДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое индеецтар ...ы; **инде́йские языки́** инддеецтар телдәре ♦ **инде́йский пету́х** ата күркә

**ИНДЕ́ЙЦЫ** *мн.* индеецтар (*Американы йәшәгән ҡәбиләләрҙең дөйөм атамаһы; хәҙерге Көньяҡ һәм Төньяҡ Американың ҡайһы бер райондарында йәшәйҙәр*) // *ед.* **инде́ец** *м* индеец ир-аты; **индиа́нка** *ж* индеец ҡатын-ҡыҙы

**И́НДЕКС** *м* индекс (**1.** *берәй нәмәнең исемлеге, күрһәткесе* **2.** *эк.* *цифрлы белешмә, күрһәткес* **3.** *мат.* *цифрҙарҙың йәки хәрефтәрҙең уң яғына ҡуйыла торған һан йәки күрһәткес*); **и́ндекс това́ров** тауарҙар индексы; **соста́вить и́ндекс** индекс төҙөү

**ИНДЕТЕРМИНИ́ЗМ** *м*; *филос.* индетерминизм (*тәбиғәт һәм йәмғиәт үҫеше ҡанундарының үҙ-ара бәйләнештә булыуын инҡар иткән фәлсәфәүи тәғлимәт*)

**ИНДИВИДУАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* *см.* **индивидуализи́ровать**

**ИНДИВИДУАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *кого-что* индивидуалләштереү (*үҙенә генә хас булған билдәләр буйынса айырыу*)

**ИНДИВИДУАЛИ́ЗМ** *м* индивидуализм (**1.** *айырым кеше мәнфәғәтен йәмғиәт, коллектив мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуйыусы ҡараш* **2.** *халыҡ менән аралашмаҫҡа, үҙ шәхесен башҡаларҙан өҫтөн ҡуйырға тырышыу*)

**ИНДИВИДУАЛИ́СТ** *м* и **ИНДИВИДУАЛИ́СТКА** *ж* индивидуалист

**ИНДИВИДУАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ** и **ИНДИВИДУАЛИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** индивидуализм ...ы, индивидуалистик; **индивидуалисти́ческая филосо́фия** индивидуалистик фәлсәфә **2.** индивидуалистик, индивидуалистарса; **индивидуалисти́ческий подхо́д к де́лу** эшкә индивидуалистарса мөнәсәбәт

**ИНДИВИДУА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** индивидуаллек, шәхсиәт, шәхсән (*бер шәхесте икенсе шәхестән айыра торған характерлы үҙенсәлектәр*); **теря́ть индивидуа́льность** индивидуаллекте юғалтыу **2.** (*личность*) шәхес, кеше

**ИНДИВИДУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* шәхси; **индивидуа́льные осо́бенности** шәхси үҙенсәлектәр; **индивидуа́льное хозя́йство** шәхси хужалыҡ; **индивидуа́льный план** шәхси план

**ИНДИВИ́ДУУМ** *м*; *книжн.* айырым кеше, шәхес, зат, индивидуум

**ИНДИ́ГО** *с нескл.* индиго (*ҡара-күк буяу*)

**И́НДИЙ** *м* индий (*химик элемент, металл*)

**ИНДИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Һиндостан ...ы ♦ **инди́йские языки́** һинд телдәре; **инди́йский чай** һинд сәйе

**ИНДИ́ЙЦЫ** *мн.* һиндостанлылар, Һиндостан халҡы // *ед.* **инди́ец** *м* Һиндостан ир-аты; **индиа́нка** *ж* Һиндостан ҡатын-ҡыҙы

**ИНДИКА́ТОР** *м* индикатор (**1.** *тех.* *объекттың торошон йәки процесс барышын күҙәтеү приборы* **2.** *хим.* *процестың үҙенсәлеген күрһәтеүсе матдә* **3.** *китапханала бирелгән китаптарҙы билдәләү картотекаһы*)

**ИНДИФФЕРЕНТИ́ЗМ** *м*; *книжн.* индифферентизм, вайымһыҙ, ғәмһеҙ, иғтибарһыҙ булыу, иҫ китмәү

**ИНДИФФЕРЕ́НТНОСТЬ** *ж*; *книжн.* индифферентлыҡ, илтифатһыҙлыҡ, иғтибарһыҙлыҡ

**ИНДОЕВРОПЕ́ЙСКИЙ:** **индоевропе́йские языки́** һинд-европа телдәре (*һинд, грек, славян, итальян, иран, герман һ.б. телдәр*)

**ИНДОНЕЗИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Индонезия ...ы; **индонези́йские языки́** Индонезия телдәре

**ИНДОНЕЗИ́ЙЦЫ** *мн.* индонезиялылар, Индонезия халҡы // *ед.* **индонези́ец** *м* Индонезия ир-аты; **индонези́йка** *ж* Индонезия ҡатын-ҡыҙы

**ИНДУИ́ЗМ** *м* индуизм (*һиндтар араһында иң киң таралған дин*)

**ИНДУИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое индуизм ...ы; **индуи́стская мифоло́гия** индуизм мифологияһы

**ИНДУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *лог.* индуктив, индукцияға нигеҙләнгән; **индукти́вный ме́тод** индуктив алым **2.** *физ.* индуктив; **индукти́вная связь** индуктив бәйләнеш; **индукти́вное сопротивле́ние** индуктив ҡаршылыҡ

**ИНДУ́КТОР** *м*; *физ.* индуктор (*алмаш ток ала торған бәләкәй электромагнитлы машина*)

**ИНДУКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *физ.* индукция …ы; **индукцио́нная кату́шка** индукция катушкаһы; **индукцио́нный ток** индукция тоғы

**ИНДУ́КЦИЯ** *ж* индукция (**1.** *лог. айырым факттар нигеҙендә дөйөм һөҙөмтә сығарыу алымы* **2.** *физ. берәй үткәргесте магнит янында йөрөткәндә шул үткәргестә электр тоғы барлыҡҡа килеү* **3.** *физиол. нервы системаһында уяныу һәм тотҡарланыу процестарының үҙ-ара бәйләнеше*); **ло́гика инду́кции** индукция логикаһы

**ИНДУЛЬГЕ́НЦИЯ** *ж* индульгенция (*католиктарҙа кисерелгән гөнаһтар өсөн бирелгән, үпселек осраҡта һатып алынған Рим Папаһы грамотаһы*)

**ИНДУСТРИАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* индустриялаштырыу; **индустриализа́ция страны́** илде индустриялаштырыу

**ИНДУСТРИАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* индустриялаштырыу

**ИНДУСТРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое индустриаль; **индустриа́льная страна́** индустриаль ил; **индустриа́льное строи́тельство** индустриаль төҙөлөш

**ИНДУСТРИ́Я** и *уст.* **ИНДУ́СТРИЯ** *ж* индустрия; **лёгкая индустри́я** еңел индустрия; **тяжёлая индустри́я** ауыр индустрия

**ИНДУ́СЫ** *мн.* (*ед.* **инду́с** *м* и **инду́ска** *ж*) **1.** *рел.* индустар (*индуизмға табыныусылар*) **2.** *уст.* һиндтар, Һиндостан халҡы

**ИНДЮ́К** *м* ата күркә; **индю́шка** *ж*; *разг.* инә күркә

**ИНДЮША́ТИНА** *ж* күркә ите

**ИНДЮША́ЧИЙ** и **ИНДЮ́ШЕЧИЙ,** -ья, -ье күркә …ы; **индюша́чьи я́йца** күркә йомортҡалары

**ИНДЮШО́НОК** *м*; *разг.* күркә себеше

**И́НЕЙ** *м* бәҫ, ҫасҡау; **дере́вья покры́лись и́неем** ағастар бәҫ менән ҡапланған

**ИНЕ́РТНОСТЬ** *ж* **1.** *физ.* инертлыҡ **2.** һүлпәнлек, дәртһеҙлек

**ИНЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *физ.* инерциялы **2.** инерт, дәртһеҙ, һүлпән; **ине́ртный челове́к** дәртһеҙ кеше ♦ **ине́ртные га́зы** *хим.* инерт газдар

**ИНЕРЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *физ.* инерция …ы; **инерцио́нное движе́ние** инерция хәрәкәте

**ИНЕ́РЦИЯ** *ж* **1.** *физ.* инерция; **зако́н ине́рции** инерция законы; **дви́гаться по ине́рции** инерция буйынса хәрәкәт итеү **2.** *перен.* һүлпәнлек, дәртһеҙлек, инициативаһыҙлыҡ; **де́лать по ине́рции** инерция буйынса (менән) эшләү, уйлап тормайынса (аңламаҫтан, аңһыҙ рәүештә) эшләү

**ИНЖЕ́КТОР** *м* инжектор (*газды, парҙы, шыйыҡлыҡты резервуарҙарға ҡыҫып тултырыу өсөн ҡулланылған насос*)

**ИНЖЕНЕ́Р** *м* инженер; **го́рный инжене́р** тау инженеры; **инжене́р-строи́тель** инженер-төҙөүсе

**ИНЖЕНЕ́РНО-ТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое инженер-техник; **инжене́рно-техни́ческие рабо́тники** инженер-техник хеҙмәткәрҙәр

**ИНЖЕНЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое инженер …ы, инженерлыҡ …ы; **инжене́рное управле́ние** инженерҙар идаралығы; **инжене́рное де́ло** инженерлыҡ эше

**ИНЖИ́Р** *м* инжир (*ағасы һәм емеше*)

**ИНЖИ́РНЫЙ,** -ая, -ое инжир …ы; **инжи́рное варе́нье** инжир ҡайнатмаһы

**ИНИЦИА́ЛЫ** *мн.* (*ед.* **инициа́л** *м*) инициал (*исем-фамилияның, атай исеменең баш хәрефтәре*)

**ИНИЦИАТИ́ВА** *ж* инициатива (**1.** *берәй эште беренсе булып башлап ебәреү* **2.** *башланғыста етәкселек роле* **3.** *үҙ аллы актив эшләү һәләте, булдыҡлылыҡ*); **инициати́ва молодёжи** йәштәр инициативаһы

**ИНИЦИАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое инициативалы; **инициати́вный челове́к** инициативалы кеше

**ИНИЦИА́ТОР** *м* инициатор, башлап ебәреүсе; **инициа́торы соревнова́ния** ярыш инициаторҙары

**ИНКАССА́ТОР** *м* инкассатор (*банкыға тапшырыу өсөн ойошмаларҙан аҡса ҡабул иткән вазифалы кеше*); **инкасса́тор ба́нка** банк инкассаторы

**ИНКАССА́ЦИЯ** *ж см.* **инкасси́рование**

**ИНКАССИ́РОВАНИЕ** *с см.* **инкасси́ровать**

**ИНКАССИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что*; *фин.* инкассирлау (*аҡса түләнергә тейешле документ буйынса аҡса алыу*)

**ИНКА́ССО** *с нескл.*; *фин.* инкассо (*тейешле документ буйынса банкынан аҡса алыу*)

**ИНКВИЗИ́ТОР** *м* инквизитор (**1.** *инквизиция судьяһы* **2.** *күсм. язалап ниҙер эйтергә мәжбүр итеүсе, ғазаплаусы*)

**ИНКВИЗИ́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое **1.** инквизитор …ы; **инквизи́торский допро́с** инквизитор һорау алыуы **2.** *перен.* инквизиторҙарса, аяуһыҙ ҡаты, рәхимһеҙ; **инквизи́торский взгляд** инквизиторҙарса ҡараш; **инквизи́торские ме́тоды** аяуһыҙ ҡаты ысулдар

**ИНКВИЗИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** инквизиция …ы; **инквизицио́нный суд** инквизиция суды **2.** *перен.* аяуһыҙ ҡаты, мәрхәмәтһеҙ

**ИНКВИЗИ́ЦИЯ** *ж* **1.** инквизиция (*дини дошмандарына ҡаршы көрәшеү өсөн католиктар дине тарафынан ойошторолған һәм йыртҡыслығы менән танылған хөкөм итеү, язалау ойошмаһы*) **2.** *перен.* аяуһыҙ, ҡаты язалау, шәфҡәтһеҙ ғазаплау

**И́НКИ** *мн.* инктар (*Перу территорияһында йәшәгән индеецтар ҡәбиләһе кешеләре*)

**ИНКО́ГНИТО 1.** *нареч.* йәшертен, исемде йәшереп, йәшерен исем менән; **путеше́ствовать инко́гнито** йәшерен исем менән сәйәхәт итеү **2.** *с нескл.* (*пребывание под вымышленным именем*) йәшерен (икенсе) исем менән; **его́ инко́гнито раскры́лось** уның йәшерен исем менән йәшәүе асыҡланды

**ИНКРИМИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что, кому-чему* ғәйепләү, ғәйеп тағыу; **инкримини́ровать хала́тное отноше́ние к свои́м обя́занностям** *кому-л. кемгәлер* үҙенең бурыстарына һалҡын ҡарай тип ғәйеп тағыу

**ИНКРУСТА́ЦИЯ** *ж* инкрустация (*әйберҙең уйып алынған урынына ағас, һөйәк йәки металл кеҫек нәмәләрҙән ҡуйылған биҙәк*)

**ИНКРУСТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* инкрустациялау, уйып биҙәк һалыу

**ИНКУБА́ТОР** *м* инкубатор

**ИНКУБАТО́РИЙ** *м* инкубаторий (*инкубация өсөн махсус йыһазландырылған бина*)

**ИНКУБА́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое инкубатор ...ы; **инкуба́торная ста́нция** инкубатор станцияһы; **инкуба́торные цыпля́та** инкубатор себештәре

**ИНКУБАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *мед., с.-х.* инкубация ...ы; **инкубацио́нный пери́од** инкубация осоро; **инкубацио́нная устано́вка** инкубация ҡоролмаһы

**ИНКУБА́ЦИЯ** *ж* инкубация (**1.** *мед. сирҙең эләккән сағынан алып беренсе билгеләре һиҙелә башлағанға тиклемге осоро* **2.** *а.-х. инкубаторҙа себеш сығарыу*)

**ИНКУБИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; с.-х.* инкубаторҙа себеш сығарыу

**ИНКУНА́БУЛА** *ж* инкунабула (*тәүге осорҙа набор хәрефтәре менән баҫылған беренсе китап*)

**ИНОВЕ́РЕЦ** *м; уст.* башҡа диндәге кеше

**ИНОГДА́** *нареч.* ҡайһы берҙә, ҡайһы ваҡытта (саҡта); **иногда́ ду́ет холо́дный ве́тер** ҡайһы ваҡытта һалҡын ел иҫә; **иногда́ он там быва́ет** ҡайһы берҙә ул унда була

**ИНОГОРО́ДНИЙ,** -яя, -ее **1.** башҡа ҡалала тороусы, башҡа ҡалалағы, башҡа (сит) ҡаланан булған; **иногоро́дние подпи́счики газе́ты** башҡа ҡаланан гәзиткә яҙылыусылар **2.** *в знач. сущ.* **иногоро́дний** *м* ситтән килеүсе; **общежи́тие для иногоро́дних** ситтән килеүселәр өсөн дөйөм ятаҡ

**ИНОЗЕ́МЕЦ** *м; уст. см.* **иностра́нец**

**ИНОЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **иностра́нный** 1

**ИНО́Й,** -ая, -ое **1.** башҡа, бүтән, икенсе; **ина́я фо́рма** икенсе форма; **у него́ ино́е мне́ние** уның фекере башҡа **2.** ҡайһы, ҡайһы бер, ниндәйҙер; **ино́й челове́к** ҡайһы кеше **3.** *в знач. сущ.* **ино́й** *м* берәү, ҡайһы берәү; **ино́му э́то мо́жет не понра́виться** быны ҡайһы берәүгә оҡшамауы мөмкин ♦ **ино́е де́ло** үҙенә башҡа эш, башҡа; **ино́й раз** ҡайһы берҙә; **не кто́ ино́й, как**; **не что́ ино́е, как** тап (үҙе), нәҡ (үҙе); **тот и́ли ино́й** теге йәки был

**ИНОПЛАНЕТЯ́НЕ** *мн.* (*ед.* **инопланетя́нин** *м*) башҡа планетала йәшәүселәр

**ИНОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое сит, ят; **иноро́дные явле́ния** ят күренештәр ♦ **иноро́дное те́ло** ят есем

**ИНОСКАЗА́НИЕ** *с* ситләтеп әйтелгән һүҙ, кинәйә, аллегория

**ИНОСКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ситләтеп әйтелгән, кинәйәле; **иносказа́тельное выраже́ние** кинәйәле һүҙ

**ИНОСТРА́НЕЦ** *м* и **ИНОСТРА́НКА** *ж* сит ил кешеһе

**ИНОСТРА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*относящийся к иному государству*) сит ил ...ы; **иностра́нные языки́** сит ил телдәре; **иностра́нные това́ры** сит ил тауарҙары **2.** (*относящийся к ведению внешней политики*) сит ил эштәре; **министе́рство иностра́нных дел** сит ил эштәре министрлығы

**ИНОХО́ДЕЦ** *м* юрға; **бе́лый инохо́дец** күк юрға; **инохо́дец чёрной ма́сти** ҡара юрға; **инохо́дец с ро́вным хо́дом** шыу юрға

**И́НОХОДЬ** *ж* юрғалау, юрға йөрөш

**ИНОЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сит телдә һөйләшкән, сит телдә баҫылған; **иноязы́чное населе́ние** сит телдә һөйләшкән халыҡ; **катало́г иноязы́чных изда́ний** сит телдә нәшер ителгән баҫмалар каталогы **2.** сит тел ...ы; **иноязы́чные слова́** сит тел һүҙҙәре

**ИНСИНУА́ЦИЯ** *ж; книжн.* яла, ялған һүҙ

**ИНСИНУИ́РОВАТЬ** *сов., несов.; книжн.* яла яғыу, ялған һөйләү

**ИНСПЕКТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* тикшереү; **инспекти́ровать шко́лы** мәктәптәрҙе тикшереү

**ИНСПЕ́КТОР** *м* инспектор; **фина́нсовый инспе́ктор** финанс инспекторы; **рабо́тать инспе́ктором** инспектор булып эшләү

**ИНСПЕ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое инспектор ...ы; **инспе́кторская прове́рка** инспектор тикшереүе

**ИНСПЕ́КТОРСТВО** *с* инспекторлыҡ

**ИНСПЕ́КЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **инспекти́ровать**; **фина́нсовая инспе́кция** финанс яғынан тикшереү **2.** (*учреждение*) инспекция; **санита́рная инспе́кция** санитар инспекцияһы

**ИНСПИРА́ТОР** *м; книжн.* ҡотҡо һалыусы, ҡотортоусы

**ИНСПИРИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *кого-что* ҡотортоу, ҡотҡо һалыу; **инспири́ровать обще́ственное мне́ние** йәмәғәт фекеренә ҡотҡо һалыу **2.** (*вызвать что-л. внушением, подстрекательством*) ҡотҡо һалып килтереп сығарыу, ҡотҡо менән ... тыуҙырыу; **инспири́ровать конфли́кт** ҡотҡо менән конфликт тыуҙырыу

**ИНСТА́НЦИЯ** *ж* инстанция (*бер-береһенә буйһонған ойошмалар системаһындағы айырым*

*баҫҡыс*); **вышестоя́щие инста́нции** юғары инстанциялар

**ИНСТИ́НКТ** *м* **1.** *биол.* инстинкт; **инсти́нкт самосохране́ния** үҙ-үҙенде һаҡлау инстинкты **2.** *перен.* (*чутьё*) инстинкт, эске һиҙем, тәбиғи тойғо; **инсти́нкт ма́тери** әсәнең эске һиҙеме, әсәлек инстинкты

**ИНСТИНКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *биол.* инстинктив, инстинктҡа нигеҙләнгән; **инстинкти́вная де́ятельность** инстинктив эшмәкәрлек **2.** ихтыярһыҙ, ирекһеҙ, ирекһеҙҙән булған; **инстинкти́вное движе́ние** ирекһеҙ хәрәкәт

**ИНСТИТУ́Т** *м*; *в разн. знач.* институт; **нау́чно-иссле́довательский институ́т** ғилми-тикшеренеү институты; **педагоги́ческий институ́т** педагогия институты; **институ́т бра́ка** никах институты

**ИНСТИТУ́ТСКИЙ,** -ая, -ое институт ...ы; **институ́тская програ́мма** институт программаһы

**ИНСТРУКТА́Ж** *м*; *разг.* инструктаж; **получи́ть инструкта́ж** инструктаж алыу

**ИНСТРУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое инструктив, (етәксе) күрһәтмәләр биргән; **инструкти́вный докла́д** инструктив доклад

**ИНСТРУКТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* инструкция үткәреү, етәксе күрһәтмәләр биреү

**ИНСТРУ́КТОР** *м* инструктор; **инстру́ктор по тури́зму** туризм буйынса инструктор

**ИНСТРУ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое инструктор ...ы; **инстру́кторские ку́рсы** инструкторҙар курсы

**ИНСТРУ́КЦИЯ** *ж* инструкция, етәксе күрһәтмәләр, ҡулланма; **сбо́рник инстру́кций** ҡулланмалар йыйынтығы; **написа́ть инстру́кцию** ҡулланма яҙыу; **соста́вить инстру́кцию** инструкция төҙөү

**ИНСТРУМЕ́НТ** *м*; *в разн. знач.* инструмент, ҡорал; **хирурги́ческие инструме́нты** хирургия инструменттары ♦ **музыка́льный инструме́нт** музыка ҡоралы

**ИНСТРУМЕНТАЛИ́СТ** *м* инструменталист (*музыкант*)

**ИНСТРУМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** инструмент ...ы; **инструмента́льная сталь** инструмент ҡоросо **2.** *в знач. сущ.* **инструмента́льная** *ж* инструмент оҫтаханаһы **3.** инструменталь, музыка ҡоралында уйналған (уйнала торған); **инструмента́льная му́зыка** инструменталь музыка

**ИНСТРУМЕНТА́ЛЬЩИК** *м* инструментсы, инструмент яһаусы

**ИНСТРУМЕНТОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *муз.* инструментовка яһау

**ИНСТРУМЕНТО́ВКА** *ж* инструментовка (**1.** *муз. музыкаль әҫәрҙе оркестр менән башҡарыуға яраҡлаштырыу* **2.** *музыка теорияһында оркестрҙа ҡатнашыу принциптарын өйрәнгән бүлек*)

**ИНСУЛИ́Н** *м* инсулин (*ашҡаҙан аҫты биҙҙәренең гормоны*)

**ИНСУ́ЛЬТ** *м*; *мед.* инсульт (*мейегә ҡан һауыу*)

**ИНСЦЕНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** сәхнәләштереү (*әҙәби әҫәрҙе сәхнәлә ҡуйыуға яраҡлаштырыу*); **инсцени́ровать рома́н** романды сәхнәләштереү **2.** *перен.* булып ҡыланыу; **инсцени́ровать о́бморок** һушын юғалтҡан булып ҡыланыу

**ИНСЦЕНИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **инсцени́ровать**; **инсцениро́вка расска́за** хикәйәне сәхнәләштереү **2.** (*постановка*) сәхнәләштерелгән әҫәр

**ИНТЕГРА́Л** *м*; *мат.* интеграл; **найти́ интегра́л** интеграл табыу

**ИНТЕГРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *мат.* интеграль; **интегра́льные уравне́ния** интеграль тигеҙләмәләр **2.** *книжн.* (*цельный, единый*) бөтөн, берҙәм

**ИНТЕГРА́ЦИЯ** *ж* **1.** *мат. см.* **интегри́ровать** 1; **2.** *книжн.* интеграция (*бер бөтөнгә төрлө өлөштәрҙе берләштереү*); **экономи́ческая интегра́ция** иҡтисади интеграция

**ИНТЕГРИ́РОВАНИЕ** *с см.* **интегри́ровать**

**ИНТЕГРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** *мат.* интегралын табыу **2.** *книжн.* интеграциялау; **интегри́ровать нау́ку и произво́дство** фән һәм етештереүҙе интеграциялау (*фән ҡаҙаныштарын етештереүҙә ҡулланыу*)

**ИНТЕЛЛЕ́КТ** *м* интеллект, аҡыл, фекерләү һәләте; **челове́к с высо́ким интелле́ктом** юғары интеллектлы кеше

**ИНТЕЛЛЕКТУА́Л** *м* интеллектуал, интеллектлы кеше

**ИНТЕЛЛЕКТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое интеллектуаль, аҡыл, рухи; **интеллектуа́льные спосо́бности челове́ка** кешенең интеллектуаль һәләттәре

**ИНТЕЛЛИГЕ́НТ** *м* зыялый, интеллигент; **он настоя́щий интеллиге́нт** ул ысын интеллигент

**ИНТЕЛЛИГЕ́НТНОСТЬ** *ж* зыялыйлыҡ, интеллигентлыҡ, уҡымышлылыҡ

**ИНТЕЛЛИГЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** зыялыйҙарға (интеллигенттарға) хас; **интеллиге́нтный вид** интеллигенттарға хас ҡиәфәт **2.** интеллигент, зыялый, уҡымышлы; **интеллиге́нтный челове́к** уҡымышлы (зыялый) кеше

**ИНТЕЛЛИГЕ́НЦИЯ** *ж* интеллигенция, зыялыйҙар; **башки́рская интеллиге́нция** башҡорт зыялыйҙары

**ИНТЕНДА́НТ** *м* интендант; **обя́занности интенда́нта** интендант бурыстары

**ИНТЕНДА́НТСКИЙ,** -ая, -ое интендант ...ы, интендантлыҡ ...ы; **интенда́нтские обя́занности** интендант бурыстары ♦ **интенда́нтская слу́жба** интендантлыҡ хеҙмәте

**ИНТЕНДА́НТСТВО** *с* интендантлыҡ (*армияла хужалыҡ эштәрен алып барған ойошма*)

**ИНТЕНСИ́ВНОСТЬ** *ж* интенсивлыҡ, көсөргәнешлелек, ныҡышмалылыҡ; **интенси́вность труда́** хеҙмәттең интенсивлығы

**ИНТЕНСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** интенсив, көсөргәнешле, ныҡышмалы; **интенси́вный труд** ныҡышмалы хеҙмәт; **интенси́вная систе́ма се́льского хозя́йства** ауыл хужалығының интенсив системаһы **2.** (*о цвете*) ҡуйы (*төҫкә ҡарата*)

**ИНТЕНСИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *книжн. см.* **интенсифици́ровать**

**ИНТЕНСИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* интенсивлаштырыу, интенсивлығын арттырыу, көсәйтеү; **интенсифици́ровать се́льское хозя́йство** ауыл хужалығын интенсивлаштырыу; **интенсифици́ровать произво́дственные проце́ссы** етештереү процестарын интенсивлаштырыу

**ИНТЕРВА́Л** *м* **1.** интервал, ара; **интерва́лы ме́жду стро́чками** юл араһындағы интервал; **поезда́ прохо́дят с интерва́лом в де́сять мину́т** поездар бер-береһенән ун минутлыҡ ара менән үтә **2.** *муз.*, *физ.* интервал; **мелоди́ческие интерва́лы** мелодия интервалдары

**ИНТЕРВЕ́НТ** *м* интервент; **борьба́ про́тив интерве́нтов** интервенттарға ҡаршы көрәш

**ИНТЕРВЕНЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое интервенция ...ы; **интервенцио́нные войска́** интервенция ғәскәрҙәре

**ИНТЕРВЕ́НЦИЯ** *ж* интервенция; **борьба́ с интерве́нцией** интервенция менән көрәш

**ИНТЕРВИ́ДЕНИЕ** *с* Интервидение; **програ́мма Интерви́дения** Интервидение программаһы

**ИНТЕРВЬЮ́** *с нескл.* интервью; **брать интервью́** интервью алыу; **дать интервью́** интервью биреү

**ИНТЕРВЬЮЕ́Р** *м*; *книжн.* интервьюсы (*интервью алыусы журналист*)

**ИНТЕРВЬЮИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого*; *книжн.* интервью алыу

**ИНТЕРЕ́С** *м* **1.** ҡыҙыҡһыныу, ҡыҙыҡ; **возбужда́ть интере́с** ҡыҙыҡһыныу уятыу; **проявля́ть интере́с** ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү; **э́то не представля́ет интере́са** бының ҡыҙығы юҡ **2.** *разг.* файҙа, мәғәнә; **нет никако́го интере́са е́хать туда́** унда барыуҙан бер файҙа ла юҡ **3.** *обычно мн.* **интере́сы** мәнфәғәт, ихтыяж; **в интере́сах о́бщества** йәмғиәт мәнфәғәтендә; **в интере́сах трудя́щихся** хеҙмәтсәндәрҙең ихтыяжынан сығып

**ИНТЕРЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙыҡлы, ҡыҙыҡтырырлыҡ; **интере́сная кни́га** ҡыҙыҡлы китап; **интере́сное откры́тие** ҡыҙыҡлы асыш **2.** *разг.* һөйкөмлө, яғымлы, сибәр; **интере́сная же́нщина** һөйкөмлө ҡатын

**ИНТЕРЕСОВА́ТЬ** *несов. кого-что* ҡыҙыҡтырыу, ҡыҙыҡһындырыу; **его́ интересу́ет те́хника** уны техника ҡыҙыҡһындыра

**ИНТЕРЕСОВА́ТЬСЯ** *несов.* ҡыҙыҡһыныу; **интересова́ться поли́тикой** сәйәсәт менән ҡыҙыҡһыныу; **она́ интересова́лась твое́й семьёй** ул һинең ғаиләң менән ҡыҙыҡһынды

**ИНТЕРЛЮ́ДИЯ** *ж*; *муз.* интерлюдия (*музыкаль әҫәрҙең өлөштәрен бәйләү хеҙмәтен үтәгән бәләкәй музыкаль пьеса йәки уның өҙөгө*)

**ИНТЕРМЕ́ДИЯ** *ж* **1.** интермедия (*драма йәки опера күренештәре араһында ҡуйыла торған көлкөлө ҡыҫҡа пьеса*) **2.** *см.* **интерлю́дия**

**ИНТЕ́РН** *м* интернатура үткән кеше

**ИНТЕРНА́Т** *м* интернат; **жить в интерна́те** интернатта йәшәү

**ИНТЕРНА́ТСКИЙ,** -ая, -ое интернат ...ы; **интерна́тский двор** интернат ихатаһы

**ИНТЕРНАТУ́РА** *ж* интернатура (*табиплыҡҡа уҡып сыҡҡандан һуң, белем камиллаштырыу һәм махсуслаштырыу маҡсатында стажировка үтеү формаһы*); **учи́ться в интернату́ре** интернатурала уҡыу

**ИНТЕРНАЦИОНА́Л** *м* **1.** (*международное объединение*) Интернационал **2.** (*гимн*) Интернационал

**ИНТЕРНАЦИОНАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **интернационализи́ровать**

**ИНТЕРНАЦИОНАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* интернационаллаштереү

**ИНТЕРНАЦИОНАЛИ́ЗМ** *м* интернационализм, халыҡ-ара теләктәшлек; **воспита́ние молодёжи в ду́хе интернационали́зма** йәштәрҙе интернационализм рухында тәрбиәләү

**ИНТЕРНАЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** интернациональ, халыҡ-ара; **интернациона́льные свя́зи** халыҡ-ара бәйләнештәр; **интернациона́льная брига́да** интернациональ бригада **2.** интернациональ, интернационализм; **интернациона́льное воспита́ние молодёжи** йәштәрҙе интернационализм рухында тәрбиәләү

**ИНТЕРНИ́РОВАНИЕ** *с* тотҡонлау, битарафлау (**1.** *ҡапма-ҡаршы һуғышыусы дәүләт ғәскәрҙәрен икенсе бер нейтраль илдә ҡулға алыу һәм ҡоралһыҙландырыу* **2.** *ҡаршы һуғышыусы ил граждандарын һуғыш бөткәнгә тиклем ирекенән мәхрүм итеү*)

**ИНТЕРНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* тотҡонлау, битарафлау

**ИНТЕРПРЕТА́ТОР** *м*; *книжн.* интерпретатор, интерпретация биреүсе; **интерпрета́тор зако́нов** ҡанундарға интерпретация биреүсе

**ИНТЕРПРЕТА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* интерпретация (**1.** *берәй нәмәне аңлатыу, мәғәнәһен асып биреү* **2.** *музыкаль әҫәрҙе йәки драматик ролде ижади башҡарыу, уның бөтә нескәлеген асыу*); **интерпрета́ция те́кста** текстҡа интерпретация биреү; **интерпрета́ция о́браза** образ интерпретацияһы

**ИНТЕРПРЕТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* интерпретация биреү

**ИНТЕРФЕРЕ́НЦИЯ** *ж*; *физ.* интерференция (*тауыш, яҡтылыҡ һ.б. тулҡындарҙың үҙ-ара тәьҫире*)

**ИНТЕРЬЕ́Р** *м*; *архит.* интерьер (*бинаның эске яғы*); **интерье́р жило́й ко́мнаты** йәшәгән бүлмәнең интерьеры

**ИНТИ́М** *м*; *разг.* **1.** (*атмосфера доверительности*) интим, ысын күңелдән **2.** (*об отношениях*) интимлыҡ, енси яҡынлыҡ

**ИНТИ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*касающийся личной жизни человека*) шәхси; **инти́мные сто́роны жи́зни** тормоштоң шәхси яҡтары **2.** (*глубоко личный, сокровенный*) интим, йәшерен, ныҡ яҡын, икәү-ара була торған; **инти́мный разгово́р** йәшерен һөйләшеү

**ИНТОКСИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *мед.* интоксикация һөҙөмтәһендә; **интоксикацио́нный психо́з** интоксикация һөҙөмтәһендә булған психик ауырыу

**ИНТОКСИКА́ЦИЯ** *ж*; *мед.* ағыуланыу, интоксикация; **лека́рственная интоксика́ция** дарыу интоксикацияһы

**ИНТОНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое интонация ...ы; **интонацио́нные осо́бенности** интонация үҙенсәлектәре

**ИНТОНА́ЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* интонация; **вопроси́тельная интона́ция** һорау интонацияһы; **с шутли́вой интона́цией** шаярыу интонацияһы менән; **фальши́вая интона́ция** *муз.* хата (яңылыш) интонация

**ИНТОНИ́РОВАТЬ** *несов.*; *книжн.* (берәй) интонация менән әйтеү (башҡарыу); **пра́вильно интони́ровать** дөрөҫ интонация менән башҡарыу; **фальши́во интони́ровать** хата интонация менән башҡарыу

**ИНТРИ́ГА** *ж* **1.** интрига, аҫтыртын этлек, мәкер; хөсөтлөк; **занима́ться интри́гами** интрига менән шөғөлләнеү **2.** *лит.* интрига (*роман йәки драма эстәлегендәге ваҡиғалар, шул ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан шәхестәрҙең мөнәсәбәте*)

**ИНТРИГА́Н** *м* и **ИНТРИГА́НКА** *ж* интригасы, интриган, аҫтыртын эш йөрөтөүсе; **быть интрига́ном** интригасы булыу

**ИНТРИГОВА́ТЬ** *несов.* **1.** интрига ҡороу (алып барыу) **2.** *кого-что* ҡыҙыҡһындырыу, ҡыҙыҡтырыу; **э́то меня́ о́чень интригу́ет** был мине бик ҡыҙыҡһындыра

**ИНТРОДУ́КЦИЯ** *ж*; *муз.* интродукция (*музыкаль әҫәрҙең инеш өлөшө*)

**ИНТУИТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое интуитив, интуицияға нигеҙләнгән; **интуити́вное чу́вство** интуитив тойғо

**ИНТУИ́ЦИЯ** *ж* интуиция (**1.** *элекке тәжрибәгә таянып дөрөҫ һиҙемләү* **2.** *хәҡиҡәтте фәнни анализ һәм иҫбатлауҙан тыш аңлау һәләтлеге*); **у него́ то́нкая интуи́ция** уның интуицияһы көслө

**ИНФАНТИЛИ́ЗМ** *м*; *мед.* инфантилизм (*кешенең физик һәм психик үҫештә артта ҡалыуы һәм бер килке балалыҡ сифаттарының һаҡланыуы*)

**ИНФАНТИ́ЛЬНОСТЬ** *ж*; *книжн.* инфантиллек

**ИНФАНТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** инфантиль, етлекмәгән; **инфанти́льный органи́зм** етлекмәгән организм **2.** балаларға хас, балаларса; **инфанти́льные привы́чки** балаларға хас ғәҙәт

**ИНФА́РКТ** *м*; *мед.* инфаркт; **инфа́ркт миока́рда** миокард инфаркты

**ИНФА́РКТНЫЙ,** -ая, -ое инфаркт ...ы; **инфа́рктное состоя́ние** инфаркт хәлендә

**ИНФЕКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *мед.* инфекцион, йоғошло; **инфекцио́нное заболева́ние** йоғошло ауырыу

**ИНФЕ́КЦИЯ** *ж* инфекция; **попада́ние инфе́кции** инфекция инеү

**ИНФИЛЬТРА́Т** *м*; *биол.*, *мед.* инфильтрат

**ИНФИЛЬТРА́ЦИЯ** *ж* **1.** *книжн.* һарҡыу, үтеү **2.** *биол.*, *мед.* инфильтрация (*тән туҡымаларына биологик шыйыҡсалар һәм төрлө химик матдәләр үтеп инеп, унда тупланыу*)

**ИНФИНИТИ́В** *м*; *грам.* инфинитив; **глаго́л в фо́рме инфинити́ва** инфинитив формаһындағы ҡылым

**ИНФЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *эк.* инфляция (*ҡағыҙ аҡсаның ҡүбәйеп, ҡиммәте төшөүе*)

**ИНФОРМА́НТ** *м* информант (*мәғлүмәт биреүсе*)

**ИНФОРМАТИ́ВНОСТЬ** *ж* информативлыҡ, хәбәрҙарлыҡ, мәғлүмәтле булыу

**ИНФОРМАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое информатив, мәғлүмәткә бай

**ИНФОРМА́ТИКА** *ж* информатика (*ғилми информацияның төҙөлөшөн өйрәнеп, уны һаҡлау һәм тапшырыу юлдарын билдәләүсе фән тармағы*)

**ИНФОРМА́ТОР** *м* информатор, информация (хәбәр) биреүсе, мәғлүмәт тапшырыусы

**ИНФОРМАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** информация ...ы; **информацио́нное бюро́** информация бюроһы **2.** информацион; **информацио́нное сообще́ние** информацион белдереү

**ИНФОРМА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **информи́ровать** **2.** информация, белдереү, мәғлүмәт, хәбәр; **дать информа́цию** информация биреү; **кра́ткая информа́ция** ҡыҫҡа мәғлүмәт; **газе́тная информа́ция** гәзит хәбәре

**ИНФОРМИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *кого-что* информация яһау, белдереү, белдереп тороу, хәбәр итеү, мәғлүмәт биреү

**ИНФРАКРА́СНЫЙ,** -ая, -ое инфраҡыҙыл ♦ **инфракра́сные лучи́** *физ.* инфраҡыҙыл нурҙар (*күҙгә күренмәй торған йылы нурҙар*)

**ИНФУЗО́РИЯ** *ж* инфузория (*һыуҙа йәшәгән бер күҙәнәкле ваҡ төҫһөҙ иң ябай тереклек*)

**ИНЦИДЕ́НТ** *м* инцидент, бәрелеш; **пограни́чный инциде́нт** сик буйы бәрелеше

**ИНЪЕКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое инъекция ...ы; **инъекцио́нные и́глы** инъекция энәләре

**ИНЪЕ́КЦИЯ** *ж* инъекция, дарыу ебәреү; **сде́лать инъе́кцию** инъекция яһау

**ИО́Н** *м*; *физ.* ион; **ио́ны кислоро́да** кислород иондары

**ИОНИЗА́ЦИЯ** *ж*; *физ.* ионизация, ионлашыу, ионизацияланыу

**ИОНИЗИ́РОВАТЬ** и **ИОНИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *физ.* ионизациялау, ионлаштырыу

**ИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *физ.* ион ...ы; **ио́нная реа́кция** ион реакцияһы

**ИПОТЕ́КА** *ж*; *эк.* ипотека (*күсмәй торған милекте залогка һалыу; шул залогка алынған аҡса*)

**ИПОТЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *эк.* ипотека ...ы; **ипоте́чный банк** ипотека банкыһы

**ИПОХО́НДРИК** *м* ипохондрик, ипохондрия менән ауырыусы

**ИПОХО́НДРИЯ** *ж* ипохондрия, өмөтһөҙлөк, күңел төшөнкөлөгө

**ИППОДРО́М** *м* ипподром (*ат сабыштырыу урыны*)

**ИПРИ́Т** *м*; *хим.* иприт (*ағыулы газ*)

**ИРА́КСКИЙ,** -ая, -ое ираҡ ...ы, Ираҡ ...ы

**ИРА́КЦЫ** *мн.* ираҡтар, ираҡ халҡы // *ед.* **ира́кец** *м* ираҡ ир-аты

**ИРАНИ́СТ** *м* иранист (*иран телдәрен һәм Иранды өйрәнеүсе*)

**ИРА́НСКИЙ,** -ая, -ое Иран ...ы ♦ **ира́нские языки́** иран телдәре

**ИРА́НЦЫ** *мн.* ирандар, Иран халҡы // *ед.* **ира́нец** *м* Иран ир-аты; **ира́нка** Иран ҡатын-ҡыҙы

**И́РБИС** *м* ирбис, ирбис бесәй (*Үҙәк Азия тауҙарында йәшәгән эре ҡырағай бесәй төрө*)

**ИРИ́ДИЙ** *м* иридий (*химик элемент, аҡһыл һоро төҫтәге ауыр металл*)

**И́РИС** *м* ирис (**1.** *бот. күк, көрән, һары сәскәле күп йыллыҡ үлән* **2.** *анат. күҙ ҡараһы әйләнәһендәге яры*)

**ИРИ́С** *м* ирис (*кәнфит*)

**ИРЛА́НДСКИЙ,** -ая, -ое ирланд ...ы, Ирландия ...ы; **ирла́ндский язы́к** ирланд теле

**ИРЛА́НДЦЫ** *мн.* ирландтар, ирланд халҡы // *ед.* **ирла́ндец** *м* ирланд ир-аты; **ирла́ндка** *ж* ирланд ҡатын-ҡыҙы

**ИРОНИЗИ́РОВАТЬ** *несов. над кем-чем* ирония менән көлөү, кәмһетеп (мыҫҡыллап) көлөү

**ИРОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ирониялы, көлөп (мыҫҡыллап, аҫтыртын) әйтелгән; **ирони́ческий взгляд** ирониялы ҡараш

**ИРО́НИЯ** *ж* ирония (*аҫтыртын көлөү*) ♦ **иро́ния судьбы́** яҙмыш шаярыуы

**ИРРАЦИОНАЛИ́ЗМ** *м*; *филос.* иррационализм

**ИРРАЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж*; *филос., мат.* иррационаллек

**ИРРАЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое иррациональ (**1.** *филос. идеалистик фәлсәфәлә логик төшөнсә менән әйтеп биреү мөмкин булмаған, аҡыл менән ирешә алмай торған* **2.** *мат. берәмек менән бүлеп булмай торған, берәмек менән үлсәнмәй торған*); **иррациона́льные чи́сла** *мат.* иррациональ һандар; **иррациона́льное уравне́ние** *мат.* иррациональ тигеҙләмә

**ИРРЕА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* реаль (ысынбарлыҡта) булмаған

**ИРРЕГУЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* иррегуляр, регуляр булмаған ♦ **иррегуля́рные войска́** иррегуляр ғәскәрҙәр

**ИРРИГА́ТОР** *м* ирригатор, һуғарыусы

**ИРРИГАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ирригация ...ы, һуғарыу ...ы; **ирригацио́нная систе́ма** һуғарыу системаһы; **ирригацио́нные сооруже́ния** ирригация ҡоролмалары

**ИРРИГА́ЦИЯ** *ж* ирригация, һуғарыу

**ИСК** *м* дәғүә (*судҡа мөрәжәғәт итеү*); **де́нежный иск** аҡсаға дәғүә; **предъяви́ть иск** дәғүә итеү (белдереү)

**ИСКАЖА́ТЬ** *несов. см.* **исказить**

**ИСКАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **искази́ться** **2.** *страд. от* **искажа́ть**

**ИСКАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **искази́ть, искази́ться** **2.** (*неправильность, ошибка*) яңылышлыҡ, хата; **гру́бые искаже́ния в те́ксте** текстағы тупаҫ хаталар

**ИСКАЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **искази́ть** **2.** *прил.* боҙоҡ, яңылыш, хата **3.** *прил.* (*изменившийся — о лице, наружности*) үҙгәргән, боҙолған, төҫ ташлаған, төҫө ҡасҡан

**ИСКАЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* боҙоу, боҙоп күрһәтеү, үҙгәртеү; **искази́ть фа́кты** факттарҙы боҙоп күрһәтеү; **боль искази́ла его́ лицо́** ауыртыу уның йөҙөн боҙоп күрһәтә

**ИСКАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* боҙолоу, үҙгәреү; **смысл искази́лся** мәғәнәһе үҙгәргән

**ИСКАЛЕ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **искале́чить** **2.** *прил.* имгәнгән, зәғиф, ғәрип; **искале́ченная нога́** зәғиф аяҡ **3.** *прил.*; *перен.* боҙолған, емерелгән, юҡҡа сыҡҡан; **искале́ченная жизнь** боҙолған тормош

**ИСКАЛЕ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* **1.** имгәтеү, ғәрипләү, зәғифләндереү **2.** *перен.* (*испортить, нравственно изуродовать*) боҙоу, емереү, юҡҡа сығарыу

**ИСКАЛЕ́ЧИТЬСЯ** *сов.* имгәнеү, зәғифләнеү, ғәрипләнеү

**ИСКА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **иска́ть** **2.** *мн.* **иска́ния** эҙләнеүҙәр; **тво́рческие иска́ния** ижади эҙләнеүҙәр

**ИСКА́ТЕЛЬ** *м* **1.** эҙләүсе, эҙләп йөрөүсе; **иска́тели же́мчуга** ынйы эҙләүселәр **2.** *тех.* эҙләгес (ҡулайлама); **телефо́нный иска́тель** телефон

эҙләгесе ♦ **иска́тель приключе́ний**: 1) мажаралар эҙләүсе; 2) сәйәхәтсе, донъя ҡыҙырыусы

**ИСКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ялағайланыулы, ялағай, ярарға тырышыусан; **иска́тельный взгляд** ялағай ҡараш

**ИСКА́ТЬ** *несов. кого-что, чего* эҙләнеү, эҙләү; **иска́ть брод** кисеү эҙләү; **иска́ть зо́лото** алтын эҙләү; **иска́ть защи́ты** яҡлау эҙләү; **иска́ть справедли́вость** ғәҙеллек эҙләү ♦ **иска́ть вчера́шний день** бушҡа ваҡыт уҙғарыу, юҡты эҙләү; **иска́ть глаза́ми** *кого-что* күҙ менән эҙләү, күрергә тырышыу; **ищи́ ве́тра в по́ле** *см.* **ве́тер**

**ИС...** *приставка см.* **из...**

**ИСКЛЕВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** суҡып бөтөрөү, талау **2.** сүпләү, сүпләп бөтөрөү; **исклева́ть всё зерно́** бөтә ашлыҡты сүпләп бөтөрөү

**ИСКЛЮЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **исключи́ть 2.** *что* (*устранять, не допускать возможности чего-л.*) юҡҡа сығарыу

**ИСКЛЮЧА́Я 1.** *деепр. от* **исключа́ть 2.** *предлог с род. п.* (*кроме, за исключением*) башҡа; **исключа́я меня́** минән башҡа

**ИСКЛЮЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **исключи́ть** — **исключа́ть**; **исключе́ние из шко́лы** мәктәптән сығарыу **2.** айырма, ситләшеү, айырымлыҡ, ташлама, үҙенә башҡа булыу; **в ви́де исключе́ния** ташлама яһап, ҡағиҙәнән ситләшеп; **де́лать исключе́ние** ташлама яһау; **все без исключе́ния** береһе лә ҡалмай, бөтәһе лә ♦ **за исключе́нием** *кого-чего* иҫәпкә алмағанда

**ИСКЛЮЧИ́ТЕЛЬНО 1.** *нареч.* иҫ киткес, ғәжәп, айырыуса, бигерәк; **исключи́тельно вку́сное блю́до** иҫ киткес тәмле аш **2.** *в знач. частицы* (*только, лишь*) фәҡәт, бары, тик, ғына; **пре́мию получи́ли исключи́тельно передовики́** бүләкте алдынғылар ғына алды

**ИСКЛЮЧИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** үҙенсәлекле булыу, айырымлыҡ; **исключи́тельность явле́ния** күренештең үҙенсәлекле булыуы **2.** (*обособленность, замкнутость*) үҙенә бер төрлөрәк, үҙенә генә хас

**ИСКЛЮЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙенә бер айырым, башҡа булған; **исключи́тельные зако́ны** үҙенә бер айырым ҡанундар **2.** ғәҙәттән тыш, үҙенә бер башҡа, айырата; **исключи́тельный слу́чай** ғәҙәттән тыш ваҡиға; **с исключи́тельной сноро́вкой** айырата бер таҫыллыҡ менән **3.** бик яҡшы, бик шәп, иҫ киткес; **това́р исключи́тельного ка́чества** бик шәп сифатлы тауар

**ИСКЛЮЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* сығарыу, төшөрөү; **исключи́ть из спи́сков** исемлектәрҙән төшөрөү; **исключи́ть из шко́лы** мәктәптән сығарыу

**ИСКОВЕ́РКАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **искове́ркать 2.** *прил.* ватылған, боҙолған, эштән сыҡҡан; **искове́рканные маши́ны** эштән сыҡҡан машиналар

**ИСКОВЕ́РКАТЬ** *сов.* **1.** *что* (*сломать, испортить*) эштән сығарыу, ватыу; **искове́ркать маши́ну** машинаны ватыу **2.** *кого-что*; *перен.* боҙоу, боҙоп бөтөрөү; **искове́ркать мысль** фекерҙе боҙоу

**ИСКОВО́Й,** -ая, -ое дәғүә ...ы; **исково́е заявле́ние** дәғүә ғаризаһы

**ИСКОЛЕСИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* йөрөп сығыу (бөтөрөү); **исколеси́ть всю о́бласть** бөтә өлкәне йөрөп сығыу

**ИСКОЛОТИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого* туҡмау, туҡмап ташлау **2.** *что* ватып (емереп, боҙоп) бөтөрөү; **исколоти́ть сте́ны гвоздя́ми** ҡаҙаҡ ҡағып стенаны боҙоп бөтөрөү

**ИСКОЛО́ТЬ** *сов. кого-что* сәнскеләп (тишкеләп) бөтөрөү; **исколо́ть па́льцы иго́лкой** бармаҡтарҙы энә менән сәнскеләп бөтөрөү

**ИСКОЛО́ТЬСЯ** *сов.* сәнселеү, сәнселеп яраланыу, сәнселеп (тишкеләнеп) бөтөү

**ИСКО́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*требуемый, нужный*) эҙләнә (асыҡлана) торған, асыҡланырға тейеш булған **2.** *мат.* эҙләнә торған, эҙләнгән; **иско́мая величина́** эҙләнә торған дәүмәл

**ИСКОНИ́** *нареч.* борон-борондан, бик күптән, элек-электән; **э́тот поря́док существова́л искони́** был тәртип борон-борондан йәшәп килгән

**ИСКО́ННЫЙ,** -ая, -ое боронғо, күптәнге, күптәнән, борондан; **иско́нный жи́тель** борондан йәшәгән кеше

**ИСКОПА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаҙылма; **ископа́емое бога́тство** ҡаҙылма байлыҡ; **ископа́емый минера́л** ҡаҙылма минерал **2.** *геол.* ҡаҙылдыҡ, ҡаҙылмаларҙа табыла торған; **ископа́емые живо́тные** ҡаҙылдыҡ хайуандар; **ископа́емые расте́ния** ҡаҙылдыҡ үҫемлектәр **3.** *в знач. сущ.* **ископа́емое** *с* ҡаҙылма, ҡаҙылдыҡ ♦ **поле́зные ископа́емые** файҙалы ҡаҙылмалар

**ИСКОПА́ТЬ** *сов. что* ҡаҙып бөтөрөү (ташлау); **он ископа́л весь двор** ул ишек алдын ҡаҙып бөтөргән

**ИСКОРЕНЕ́НИЕ** *с см.* **искорени́ть** — **искореня́ть**

**ИСКОРЕНИ́ТЬ** *сов. что* бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, тамырын ҡоротоу; **искорени́ть недоста́тки** етешһеҙлектәрҙең тамырын ҡоротоу

**ИСКОРЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* бөтөү, юҡҡа сығыу, тамыры ҡороу

**ИСКОРЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **искорени́ть**

**ИСКОРЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **искорени́ться 2.** *страд.* от **искореня́ть**

**И́СКОСА** *нареч.* ҡырын-ҡырын ғына, аҫтан, ҡырын, күҙ сите (ҡырыйы) менән генә; **и́скоса погля́дывать** күҙ сите менән генә ҡарап ҡуйыу

**И́СКРА** *ж* **1.** осҡон, сатҡы; **электри́ческая и́скра** электр сатҡыһы **2.** ынйылай бөртөк; **и́скры сне́га** ынйылай ҡар бөртөктәре **3.** ялтырауыҡ, төрткө; **мате́рия с и́скрой** ялтырауыҡлы

туҡыма **4.** *перен.* сатҡы; **и́скра наде́жды** өмөт сатҡыһы ♦ **и́скры из глаз посы́пались** күҙҙән уттар күренде

**И́СКРЕННИЙ,** -яя, -ее ихлас, ихлас (саф) күңелле, эскерһеҙ, ысын күңелдән; **и́скренний челове́к** ихлас күңелле кеше; **и́скренний друг** эскерһеҙ дуҫ; **и́скренняя благода́рность** ысын күңелдән рәхмәт әйтеү; **и́скренняя пре́данность** ысын күңелдән бирелгәнлек

**И́СКРЕННОСТЬ** *ж* эскерһеҙлек, ихлас (саф) күңеллелек, ихласлыҡ; **прояви́ть и́скренность** ихласлыҡ күрһәтеү

**ИСКРИВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** кәкрәйтеү, бөгөү; **искриви́ть гвоздь** ҡаҙаҡ кәкрәйтеү **2.** (*о лице*) боҙоу, һытыу

**ИСКРИВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кәкрәйеү, бөгөлөү **2.** (*о лице*) боҙоу, һытылыу

**ИСКРИВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **искриви́ть** — **искривля́ть**, **искриви́ться**; **искривле́ние позвоно́чника** умыртҡа бағанаһының кәкрәйеүе **2.** (*искривлённое место*) кәкрәйгән урын **3.** *перен.* (*искажение*) тайпылыу, тайпылыш; **искривле́ние полити́ческой ли́нии** сәйәси йүнәлештән тайпылыу

**ИСКРИВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **искриви́ть**

**ИСКРИ́СТЫЙ** и **И́СКРИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** емелдәп торған; **искри́стый снег** емелдәп торған ҡар **2.** уйнап (бызырлап, семерләп) торған; **искри́стое вино́** бызырлап торған шарап

**ИСКРИ́ТЬ** *несов.* осҡон сығарыу

**ИСКРИ́ТЬСЯ** и **И́СКРИТЬСЯ** *несов.* осҡонланыу, осҡон сәсеү, ялтырау, емелдәү; **его́ глаза́ искря́тся** уның күҙҙәре ялтырай; **снег искри́лся на со́лнце** ҡар ҡояшта емелдәй ине

**ИСКРОВО́Й,** -ая, -ое осҡон ...ы, сатҡы ...ы

**ИСКРОМЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бызырлап (семерләп) торған; **искромётное вино́** бызырлап торған шарап **2.** *перен.* (*яркий, сверкающий*) үткер, янып торған; **искромётный взгляд** үткер ҡараш

**ИСКРОМСА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* киҫкеләп (тураҡлап) бөтөрөү; **искромса́ть сукно́** буҫтауҙы киҫкеләп бөтөрөү; **искромса́ть хлеб** икмәкте тураҡлап бөтөрөү

**ИСКРОШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ваҡлап (турап, тураҡлап) бөтөрөү, ваҡлау, тураҡлау **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*изрубить*) тураҡлау, тураҡлап (сапҡылап) бөтөрөү

**ИСКУПА́ТЬ I** *сов. кого*; *разг.* ҡойондороу, һыу индереү; **искупа́ть ребёнка** баланы һыу индереү

**ИСКУПА́ТЬ II** *несов. см.* **искупи́ть**

**ИСКУПА́ТЬСЯ I** *сов.*; *разг.* ҡойоноу, һыу инеү; **искупа́ться в реке́** йылғала һыу инеү

**ИСКУПА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **искупи́ться** **2.** *страд. от* **искупа́ть** II

**ИСКУПИ́ТЬ** *сов. что* **1.** йолоу, ҡотолдороу, юйыу; **искупи́ть свою́ вину́** үҙ ғәйебеңде юйыу **2.** (*возместить*) ҡаплау, ҡайтарыу

**ИСКУПИ́ТЬСЯ** *сов.* йолоноу, ғәфү ителеү, кисерелеү

**ИСКУПЛЕ́НИЕ** *с* ҡотҡарыу, ғәфү (ителеү) итеү; **искупле́ние вины́** ғәйептең ғәфү ителеүе

**ИСКУ́С** и **И́СКУС** *м* һынау; **вы́держать иску́с** (ауыр) һынау тотоу

**ИСКУСА́ТЬ** *сов. кого-что* тешләп (сәйнәп) бөтөү, талау; **соба́ка искуса́ла** эт талаған

**ИСКУСИ́ТЕЛЬ** *м*; *книжн.* аҙҙырыусы, вәсүәсәсе

**ИСКУСИ́ТЬ** *сов. см.* **искуша́ть**

**ИСКУ́СНИК** *м* и **ИСКУ́СНИЦА** *ж*; *разг.* оҫта, маһир; **большо́й иску́сник в своём де́ле** үҙ эшенең ҙур оҫтаһы

**ИСКУ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҫта, маһир; **иску́сный портно́й** оҫта тегеүсе **2.** (*мастерски исполненный*) оҫта эшләнгән (башҡарылған); **иску́сная рабо́та** оҫта эшләнгән эш

**ИСКУ́ССТВЕННОСТЬ** *ж* яһалмалыҡ

**ИСКУ́ССТВЕННЫЙ,** -ая, -ое яһалма; **иску́сственный шёлк** яһалма ебәк; **иску́сственная улы́бка** яһалма йылмайыу

**ИСКУ́ССТВО** *с* **1.** сәнғәт; **изобрази́тельное иску́сство** һынлы сәнғәт; **пе́вческое иску́сство** йыр сәнғәте; **произведе́ние иску́сства** сәнғәт әҫәре **2.** (*умение, мастерство*) оҫталыҡ, маһирлыҡ, таһыллыҡ; **с больши́м иску́сством** ҙур оҫталыҡ менән ♦ **из любви́ к иску́сству** сәнғәткә булған һөйөүҙән

**ИСКУССТВОВЕ́Д** *м* сәнғәт белгесе

**ИСКУССТВОВЕ́ДЕНИЕ** *с* сәнғәт фәне (белеме)

**ИСКУССТВОВЕ́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сәнғәт фәне (ғилеме) ...ы; **искусствове́дческая литерату́ра** сәнғәт фәне әҙәбиәте; **искусствове́дческие нау́ки** сәнғәт белеме фәндәре

**ИСКУША́ТЬ** *несов. кого-что* ҡыҙыҡтырыу, ҡотҡо (вәсүәсә) һалыу ♦ **искуша́ть судьбу́** яҙмышты һынап ҡарау, тәүәккәлләп ҡарау

**ИСКУШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **искуси́ть** — **искуша́ть** **2.** вәсүәсә, ҡотҡо; **подда́ться искуше́нию** ҡотҡоға бирелеү; **вводи́ть в искуше́ние** вәсүәсә һалыу

**ИСКУШЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **искуси́ть** **2.** *прил.* оҫтарған, тәжрибәле, йышылған, шымарған; **искушённый в поли́тике** сәйәсәттә йышылған

**ИСЛА́М** *м* ислам (*дин*)

**ИСЛА́НДСКИЙ,** -ая, -ое исланд ...ы, Исландия ...ы; **исла́ндский язы́к** исланд теле; **исла́ндский наро́д** исланд халҡы

**ИСЛА́НДЦЫ** *мн.* исландтар, исланд халҡы // *ед.* **исла́ндец** *м* исланд ир-аты; **исла́ндка** *ж* исланд ҡатын-ҡыҙы

**ИСПА́НКА I** *ж см.* **испа́нцы**

**ИСПА́НКА II** *ж* испанка (*грипп ауырыуы төрө*)

**ИСПА́НСКИЙ,** -ая, -ое испан ...ы, Испания ...ы; **испа́нский та́нец** испан бейеүе; **испа́нский язы́к** испан теле

**ИСПА́НЦЫ** *мн.* испандар, испан халҡы // *ед.* **испа́нец** *м* испан ир-аты; **испа́нка** *ж* испан ҡатын-ҡыҙы

**ИСПАРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **испари́ть** — **испаря́ть, испари́ться** — **испаря́ться 2.** *обычно мн.* **испаре́ния** пар, быу; **вре́дные испаре́ния** зарарлы быу

**ИСПА́РИНА** *ж* тир; **покры́ться испа́риной** тиргә батыу; **на его́ лице́ вы́ступила испа́рина** битенә тир бәреп сыҡты

**ИСПАРИ́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* быуландырғыс, парландырғыс (*аппарат*)

**ИСПАРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое быуланыу ...ы, парланыу ...ы; **испари́тельная спосо́бность** парланыу һәләте

**ИСПАРИ́ТЬ** *сов. что* парға (быуға) әйләндереү; **испари́ть во́ду** һыуҙы парға әйләндереү

**ИСПАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** парға (быуға) әйләнеү **2.** *перен.*, *ирон.* юҡ булыу, юҡҡа сығыу, һыҙыу, тайыу, шылыу; **он куда́-то испари́лся** ул ҡайҙалыр юҡ булды

**ИСПАРЯ́ЕМОСТЬ** *ж* быуланыу (парланыу) һәләте

**ИСПАРЯ́ТЬ** *несов. см.* **испари́ть**

**ИСПАРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **испари́ться 2.** *страд. от* **испаря́ть**

**ИСПА́ЧКАТЬ** *сов. кого-что* бысратып (буяп) бөтөрөү

**ИСПА́ЧКАТЬСЯ** *сов.* бысранып (буялып) бөтөү

**ИСПЕПЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (яндырып) көл итеү, көлгә әйләндереү **2.** *перен.* өтөү, өтөп (көйҙөрөп) алыу, көйҙөрөү; **испепели́ть взгля́дом** ҡараш менән өтөп алыу

**ИСПЕПЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* янып бөтөү, көлгә әйләнеү

**ИСПЕПЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **испепели́ть**

**ИСПЕПЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **испепели́ться 2.** *страд. от* **испепеля́ть**

**ИСПЕСТРИ́ТЬ** *сов. что* сыбарлау, сыбарлап бөтөрөү

**ИСПЕ́ЧЬ** *сов. что* бешереү, бешереп алыу; **испе́чь хлеб** икмәк бешереп алыу

**ИСПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* бешеү, бешеп сығыу; **пиро́г хорошо́ испёкся** бәлеш һәйбәт бешкән

**ИСПЕЩРИ́ТЬ** *сов. что* сыбарлап бөтөү; **испещри́ть следа́ми** эҙҙәр менән сыбарлап бөтөү

**ИСПЕЩРЯ́ТЬ** *несов. см.* **испещри́ть**

**ИСПИСА́ТЬ** *сов. что* **1.** яҙып тултырыу (бөтөрөү); **исписа́ть це́лую тетра́дь** бөтөн бер дәфтәрҙе яҙып бөтөрөү **2.** *разг.* (*истратить*) яҙыуға (тотоноп) бөтөрөү; **исписа́ть после́дний каранда́ш** аҙаҡҡы ҡәләмде яҙып бөтөрөү

**ИСПИСА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яҙылып (тотолоп) бөтөү, яҙа-яҙа бөтөү; **каранда́ш исписа́лся** ҡәләм яҙа-яҙа бөттө **2.** *перен.* яҙыу һәләте бөтөү, яҙыу һәләте ҡайтыу

**ИСПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **исписа́ть**

**ИСПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **исписа́ться 2.** *страд. от* **испи́сывать**

**ИСПИТО́Й,** -ая, -ое *разг.* таушалған, йонсоған; **испито́е лицо́** таушалған йөҙ

**ИСПОВЕ́ДАНИЕ** *с*; *книжн.* динле булыу, иманлы булыу

**ИСПОВЕ́ДАТЬ** *сов.*; *разг. см.* **испове́довать** 1—3

**ИСПОВЕ́ДАТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **испове́доваться** 1—2

**ИСПОВЕ́ДНИК** *м* **1.** (*священник*) тәүбә иттереүсе **2.** (*тот, кто пришёл на исповедь*) тәүбә итеүсе, тәүбәгә килеүсе

**ИСПОВЕ́ДОВАТЬ 1.** *сов.*, *несов. кого* (*подвергнуть исповеди, выслушать покаяние*) тәүбә иттереү, тәүбәгә килтереү **2.** (*покаяться в своих грехах на исповеди*) тәүбә итеү, тәүбәгә килеү **3.** *перен.* (*рассказать о себе что-л. хранимое до сих пор в тайне*) асып һалыу, һөйләп биреү (күңелдәгеn) **4.** *книжн.* (юлын, динен) тотоу, (диненә) ышаныу, инаныу; **испове́довать исла́м** ислам динен тотоу

**ИСПОВЕ́ДОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* тәүбә итеү, тәүбә ҡылыу **2.** *сов.*, *несов.*; *перен.* асыҡтан-асыҡ һөйләп биреү, (серҙе, хәбәрҙе) асып һалыу **3.** *несов. страд. от* **испове́довать**

**И́СПОВЕДЬ** *ж* **1.** *церк.* тәүбә итеү **2.** *перен.* (*откровенное признание*) (күңелдәген) асып һалыу, асыҡтан-асыҡ һөйләү

**И́СПОДВОЛЬ** *нареч.*; *разг.* әҙләп-әҙләп, әкренләп; **и́сподволь подгото́виться к отъе́зду** әкренләп юлға әҙерләнеү

**ИСПОДЛО́БЬЯ** *нареч.* ҡаш аҫтынан; **гляде́ть исподло́бья** ҡаш аҫтынан ҡарау

**ИСПОДНИ́ЗУ** и **ИСПО́ДНИЗУ** *нареч.*; *разг.* түбәндән, аҫтан, (нимәнеңдер) аҫтынан

**ИСПОДТИШКА́** *нареч.*; *разг.* аҫтыртын, йәшерен; **де́лать исподтишка́** аҫтыртын эшләү; **смея́ться исподтишка́** аҫтыртын көлөү

**ИСПОКО́Н: испоко́н ве́ку (веко́в)** борон-борондан, элек-электән, бик күптән, әүәл-әүәлдән

**ИСПОЛИ́Н** *м*; *книжн.* **1.** алпамыша, бәһлеүән, әҙмәүер **2.** *чего*; *перен.* бөйөк кеше, даһи; **исполи́ны нау́ки** фәндең бөйөк кешеләре

**ИСПОЛИ́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** бәһлеүән, әҙмәүерҙәй; **челове́к исполи́нского ро́ста** әҙмәүерҙәй кеше **2.** бик ҙур, ғәҙәттән тыш ҙур; **исполи́нские пла́ны** ғәҙәттән тыш ҙур пландар

**ИСПОЛКО́М** *м* (*исполнительный комитет*) башҡарма комитет

**ИСПОЛНЕ́НИЕ** *с см.* **испо́лнить** I — **исполня́ть** I, **испо́лниться** I — **исполня́ться** I; **прове́рка исполне́ния** үтәлешен тикшереү; **исполне́ние прика́за** бойороҡто үтәү; **исполне́ние ро́ли** роль башҡарыу (уйнау)

**ИСПО́ЛНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **испо́лнить** II; **2.** *прил.* тулған, солғап алынған, һуғарылған; **испо́лненный го́рдости** ғорурлыҡ менән һуғарылған

**ИСПОЛНИ́МЫЙ,** -ая, -ое башҡарылырлыҡ, бойомға (тормошҡа) ашырырлыҡ, үтәлерлек; **исполни́мое жела́ние** үтәлерлек теләк

**ИСПОЛНИ́ТЕЛЬ** *м* и **ИСПОЛНИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** үтәүсе, башҡарыусы; **исполни́тель поруче́ний** йомош үтәүсе **2.** башҡарыусы, уйнаусы; **исполни́тель наро́дных пе́сен** халыҡ йырҙарын башҡарыусы ♦ **суде́бный исполни́тель** суд эштәрен башҡарыусы

**ИСПОЛНИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* эште теүәл башҡарыу

**ИСПОЛНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** башҡарма, башҡарыусы; **исполни́тельный комите́т** башҡарма комитет **2.** (*старательный*) йомошсан, тыңлаусан, бик тырыш (үтәүсән); **исполни́тельный ребёнок** тыңлаусан бала ♦ **исполни́тельный лист** башҡарыу ҡағыҙы (*суд карарын бойомға ашырыу өсөн суд тарафынан бирелгән бойороҡ*)

**ИСПО́ЛНИТЬ I** *сов. что* **1.** үтәү, башҡарыу, бойомға ашырыу; **испо́лнить прика́з** бойороҡто үтәү; **испо́лнить про́сьбу** үтенесте үтәү **2.** башҡарыу, уйнау; **испо́лнить та́нец** бейеү башҡарыу

**ИСПО́ЛНИТЬ II** *сов. кого-что*; *уст.* тултырыу, һуғарыу, рухландырыу; **испо́лнить се́рдце наде́ждой** күңелде өмөт менән тултырыу

**ИСПО́ЛНИТЬСЯ I** *сов.* **1.** үтәлеү, бойомға (тормошҡа) ашыу, башҡарылыу; **испо́лнилось заве́тное жела́ние** изге теләк тормошҡа ашты **2.** *кому-чему безл.* (*о сроке, возрасте*) үтеү, тулыу, булыу; **ма́льчику испо́лнилось де́сять лет** малайға ун йәш тулды

**ИСПО́ЛНИТЬСЯ II** *сов. чем, чего* тулыу, һуғарылыу; **её се́рдце испо́лнилось ра́достью** уның йөрәге шатлыҡ менән тулды

**ИСПОЛНЯ́ТЬ I** *несов.* **1.** *см.* **испо́лнить** I; **2.** башҡарыу; **исполня́ть обя́занности заве́дующего** мөдир вазифаһын башҡарыу

**ИСПОЛНЯ́ТЬ II** *несов. см.* **испо́лнить** II

**ИСПОЛНЯ́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **испо́лниться** I; **2.** *страд. от* **исполня́ть** I

**ИСПОЛНЯ́ТЬСЯ II** *несов. см.* **испо́лниться** II

**ИСПОЛОСОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* буй-буйға (тураҡлап, ҡырҡҡылап, һыҙғылап) телгеләп бөтөрөү; **исполосова́ть ткань** тауарҙы буй-буйға телгеләп бөтөрөү **2.** *кого-что* (*избить бичом, кнутом и т.п.*) ҡамсылау, сыбыртҡы менән ярыу

**И́СПОЛУ** *нареч.* уртаҡҡа, уртағына, яртылаш; **рабо́тать и́сполу** яртылаш эшләү

**ИСПО́ЛЬЗОВАНИЕ** *с см.* **испо́льзовать**; **испо́льзование ме́стного сырья́** урындағы сеймалды ҡулланыу

**ИСПО́ЛЬЗОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* файҙаланыу, ҡулланыу; **испо́льзовать в рабо́те но́вый ме́тод** эштә яңы ысул ҡулланыу; **испо́льзовать а́томную эне́ргию в ми́рных це́лях** атом энергияһын тыныслыҡ маҡсатында файҙаланыу; **испо́льзовать удобре́ние** ашлама ҡулланыу

**ИСПО́ЛЬЗОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡулланылыу, файҙаланылыу **2.** *страд. от* **испо́льзовать**

**ИСПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уртаҡҡа (яртылаш) эшләү ...ы, уртаҡҡа (яртылаш) эшләнә торған; **испо́льная систе́ма** уртаҡҡа эшләү системаһы

**ИСПО́ЛЬЩИК** *м* уртаҡҡа эшләүсе (*крәҫтиән*)

**ИСПО́ЛЬЩИНА** *ж* уртаҡҡа эшләү (*алынған уңыштың яртыһы ер хужаһына бирелеү системаһы*)

**ИСПО́РТИТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* боҙоу; **испо́ртить маши́ну** машинаны боҙоу; **испо́ртить зре́ние** күҙҙе боҙоу; **испо́ртить не́рвы** нервы боҙоу; **испо́ртить настрое́ние** кәйеф боҙоу; **испо́ртить плохи́м воспита́нием** насар тәрбиә менән боҙоу

**ИСПО́РТИТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* боҙолоу; **испо́ртилась пого́да** көн боҙолдо; **испо́ртилось зре́ние** күҙ боҙолдо; **часы́ испо́ртились** сәғәт боҙолдо; **мя́со испо́ртилось** ит боҙолған

**ИСПО́РЧЕННОСТЬ** *ж* боҙолғанлыҡ

**ИСПО́РЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **испо́ртить** **2.** *прил.* боҙоҡ, боҙолған; **испо́рченная игру́шка** боҙолған уйынсыҡ; **испо́рченные отноше́ния** боҙолған (насар) мөнәсәбәттәр; **испо́рченный ребёнок** боҙолған бала; **испо́рченное мя́со** боҙолған ит

**ИСПРАВИ́МЫЙ,** -ая, -ое төҙәтерлек, төҙәлерлек; **э́та беда́ исправи́ма** был төҙәтерлек эш

**ИСПРАВИ́ТЕЛЬНО-ТРУДОВО́Й,** -ая, -ое холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт; **исправи́тельно-трудова́я коло́ния** холоҡ төҙәтеү-хеҙмәт колонияһы

**ИСПРАВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое төҙәтеү ...ы; **исправи́тельные ме́ры** төҙәтеү саралары; **исправи́тельные рабо́ты** холоҡ төҙәтеү эштәре

**ИСПРА́ВИТЬ** *сов. кого-что* төҙәтеү; **испра́вить водопрово́д** һыу үткәргесте төҙәтеү; **испра́вить оши́бку** хата төҙәтеү; **испра́вить хара́ктер** холоҡто төҙәтеү

**ИСПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* төҙәлеү; **испра́вилось зре́ние** күҙ төҙәлде

**ИСПРАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **испра́вить** — **исправля́ть**, **испра́виться** — **исправля́ться** **2.** төҙәтмә, төҙәтеү; **внести́ исправле́ния в ру́копись** ҡулъяҙмаға төҙәтмәләр индереү

**ИСПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **испра́вить**

**ИСПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **испра́виться** **2.** *страд. от* **исправля́ть**

**ИСПРА́ВНИК** *м*; *ист.* исправник (*революцияға тиклем Рәсәйҙә өйәҙ полицияһы башлығы*)

**ИСПРА́ВНОСТЬ** *ж* **1.** төҙөклөк, эшкә яраҡлылыҡ; **испра́вность мото́ра** моторҙың төҙөклөгө

2. (*исполнительность*) тыңлаусанлыҡ, күндәмлек

**ИСПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төҙөк, бөтөн, эшкә яраҡлы; **испра́вный прибо́р** төҙөк прибор **2.** (*исполнительный*) тыңлаусан, күндәм, тырыш, кеше ыңғайлы; **испра́вный рабо́тник** күндәм хеҙмәткәр

**ИСПРАЖНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **испражни́ться** — **испражня́ться 2.** *мн.* **испражне́ния** тиҙәк

**ИСПРАЖНИ́ТЬСЯ** *сов.* тышҡа сығыу, оло ярау итеү

**ИСПРАЖНЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **испражни́ться**

**ИСПРО́БОВАТЬ** *сов. что* **1.** (*проверить годность*) һынау, һынап ҡарау; **испро́бовать но́вый инструме́нт** яңы ҡоралды һынап ҡарау **2.** (*узнать на собственном опыте*) һынап ҡарау, ҡарау; **испро́бовать все возмо́жности** бөтә мөмкинлектәрҙе һынап ҡарау **3.** *разг.* (*отведать*) тәмен татып (тәмләп, ашап) ҡарау, ауыҙ итеү

**ИСПУ́Г** *м* ҡурҡыу, ҡурҡыш, өркөү, шөрләү; **с испу́гу** ҡурҡыштан; **от испу́га потеря́ть дар ре́чи** ҡурҡыштан телһеҙ ҡалыу ♦ **брать (взять) на испу́г** ҡурҡытыу, ҡурҡытып ҡыҫмаға алыу

**ИСПУ́ГАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **испуга́ть 2.** *прил.* ҡурҡҡан, өрккән, шөрләгән; **испу́ганные лю́ди** ҡурҡҡан кешеләр; **испу́ганный вид** ҡурҡҡан ҡиәфәт

**ИСПУГА́ТЬ** *сов. кого-что* ҡурҡытыу, өркөтөү

**ИСПУГА́ТЬСЯ** *сов. кого-чего* ҡурҡыу, өркөү; **испуга́ться тру́дностей** ауырлыҡтарҙан ҡурҡыу

**ИСПУСКА́ТЬ** *несов. что* **1.** *см.* **испусти́ть 2.** (*распространять, излучать*) таратыу, аңҡытыу

**ИСПУСТИ́ТЬ** *сов. что* сығарыу, ҡуйыу, ебәреү; **испусти́ть вопль** үкһеп ебәреү ♦ **испусти́ть дух** *уст.* йән биреү, һуңғы һулыш алыу

**ИСПЫТА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **испыта́ть**; **испыта́ние дви́гателя** двигателде һынап ҡарау **2.** һынау, имтихан; **приёмные испыта́ния** ҡабул итеү имтихандары **3.** (*жизненные трудности, невзгоды*) ауыр һынау, ауырлыҡ, кисереш; **суро́вые испыта́ния войны́** һуғыш ауырлыҡтары

**ИСПЫ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **испыта́ть 2.** *прил.* һынап ҡаралған, һыналған, тикшерелгән; **испы́танный бое́ц** һыналған һалдат; **испы́танный приём** тикшерелгән алым

**ИСПЫТА́ТЕЛЬ** *м* һынаусы; **лётчик-испыта́тель** һынаусы лётчик; **испыта́тель маши́ны** машина һынаусы

**ИСПЫТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һынау ...ы; **испыта́тельный полёт** һынау осошо; **испыта́тельный срок** һынау срогы

**ИСПЫТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һынау, һынап ҡарау; **испыта́ть стано́к** станокты һынап ҡарау; **испыта́ть но́вого рабо́тника** яңы хеҙмәткәрҙе һынау **2.** *что* (*пережить, ощутить*) кисереү, күреү, татыу; **испыта́ть нужду́** мохтажлыҡ кисереү; **испыта́ть ра́дость** шатлыҡ кисереү; **испыта́ть удово́льствие** ләззәт татыу ♦ **испыта́ть на свое́й (со́бственной) шку́ре** *что* үҙ елкәңдә татыу

**ИСПЫТУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое һынала (тикшерелә) торған, һынау үтеүсе; **испыту́емый материа́л** һынала торған материал

**ИСПЫТУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее тикшерелә торған, һынаулы, һынау үткәреүсе, иғтибарлы; **испыту́ющий взгляд** һынаулы ҡараш

**ИСПЫ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **испыта́ть**

**ИССЕКА́ТЬ I** *несов. см.* **иссе́чь** I

**ИССЕКА́ТЬ II** *несов. см.* **иссе́чь** II

**И́ССЕРА-...** һорғолт; **и́ссера-бе́лый** һорғолт аҡ

**ИССЕ́ЧЬ I** *сов. что* **1.** соҡоу, ҡырыу, юныу; **иссе́чь ста́тую из мра́мора** мәрмәрҙән ҡырып статуя яһау **2.** *мед.* ҡырҡып (киҫеп) алыу (ташлау); **иссе́чь о́пухоль** шеште киҫеп ташлау

**ИССЕ́ЧЬ II** *сов. кого-что* **1.** (*изрубить, рассечь чем-л.*) ҡырҡыу, киҫеү, ҡыйыу **2.** *уст.* (*избить плетью, розгами и т.п.*) туҡмау, ҡамсылау, сыбыртҡылау; **иссе́чь кнуто́м** сыбыртҡылау

**И́ССИЗА-...** күгелйем; **и́ссиза-голубо́й** күгелйем зәңгәр

**И́ССИНЯ-...** күкһел, зәңгәрһыу; **и́ссиня-зелёный** зәңгәрһыу йәшел

**ИССЛЕ́ДОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **иссле́довать 2.** ғилми (фәнни) хеҙмәт (тикшеренеү); **иссле́дование по башки́рскому языку́** башҡорт теле буйынса ғилми хеҙмәт

**ИССЛЕ́ДОВАТЕЛЬ** *м* тикшеренеүсе, тикшереүсе, өйрәнеүсе, ғилми хеҙмәткәр

**ИССЛЕ́ДОВАТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое тикшеренеү ...ы, тикшереү ...ы; **иссле́довательская рабо́та** тикшеренеү эше; **иссле́довательские спосо́бности** тикшереү һәләтлектәре

**ИССЛЕ́ДОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** тикшереү, тикшеренеү, өйрәнеү; **иссле́довать зако́ны приро́ды** тәбиғәт ҡанундарын өйрәнеү **2.** ҡарау, тикшереү, ҡарап сығыу; **иссле́довать больно́го** ауырыуҙы ҡарау

**ИССО́ХНУТЬ** *сов.*; *прям., перен.* кибеү, кибеп (ҡороп) бөтөү; **иссо́хнуть от тоски́** һағыштан кибеү; **ре́ки иссо́хли** йылғалар ҡороп бөттө

**И́ССТАРИ** *нареч.* борондан, күптән, элек-электән

**ИССТРАДА́ТЬСЯ** *сов.* яфаланыу, ғазапланыу, интегеү, ғазапланып (интегеп, яфаланып) бөтөү; **исстрада́ться в одино́честве** яңғыҙлыҡтан яфаланыу

**ИССТРЕЛЯ́ТЬ** *сов. что* **1.** атып бөтөрөү; **исстреля́ть все патро́ны** бөтә патрондарҙы атып бөтөрөү **2.** *разг.* атып, тишкеләп бөтөрөү; **исстреля́ть всю мише́нь** сәпкә атып, тишкеләп бөтөрөү

**ИССТУПЛЕ́НИЕ** *с* сикһеҙ шашыу (шашыныу, ярһыу, ҡотороноу); **прийти́ в исступле́ние** сикһеҙ шашыныу

**ИССТУПЛЁННОСТЬ** *ж* сикһеҙ шашҡанлыҡ (ярһығанлыҡ)

**ИССТУПЛЁННЫЙ,** -ая, -ое сикһеҙ ныҡ шашҡан (шашынған, ярһыған, ҡоторған); **исступлённый взгляд** сикһеҙ шашынған ҡараш; **исступлённый крик** ныҡ ярһыған тауыш

**ИССУША́ТЬ** *несов. см.* **иссуши́ть**

**ИССУШИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** киптереп (ҡоротоп) бөтөрөү; **жара́ иссуши́ла боло́то** эҫе көндәр һаҙлыҡты киптереп бөтөрҙө **2.** *перен.* киптереү; **боле́знь иссуши́ла его́** сир уны киптерҙе

**ИССЫХА́ТЬ** *несов. см.* **иссо́хнуть**

**ИССЯ́КНУТЬ** *сов.* **1.** ҡороу, кибеү, ҡороп (кибеп) бөтөү; **исто́чник исся́к** шишмә ҡороған **2.** бөтөү; **си́лы исся́кли** көс бөттө

**ИСТА́ПТЫВАТЬ** *несов. см.* **истопта́ть**

**ИСТА́СКАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **истаска́ть** **2.** *прил.* туҙған, ныҡ иҫкергән, таушалған; **иста́сканная о́бувь** туҙған аяҡ кейеме **3.** *прил.*; *перен.* (*избитый*) тапалған, күп сәйнәлгән; **иста́сканная фра́за** күп сәйнәлгән һүҙҙәр **4.** *прил.*; *перен.* (*о внешнем виде*) төҫ ташлаған, йонсоған, бирешкән, таушалған; **иста́сканное лицо́** йонсоған йөҙ

**ИСТАСКА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** кейеп туҙҙырыу (иҫкертеү, таушалдырыу), туҙҙырып бөтөрөү; **истаска́ть пальто́** пальтоны кейеп туҙҙырыу **2.** *перен.* (*сделать избитым*) ҡәҙерен ебәреү

**ИСТАСКА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кейелеп туҙыу (туҙып бөтөү); **пла́тье истаска́лось** күлдәк кейелеп туҙған **2.** *перен.* (*изнуриться*) туҙыу, таушалыу

**ИСТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **истéчь**

**ИСТЕ́КШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **истéчь** **2.** *прил.* үткән, уҙған; **в исте́кшем году́** үткән йылда

**ИСТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*трением размельчить до конца*) ҡырыу, ҡырып бөтөрөү; **истере́ть весь сыр на тёрке** бөтә сырҙы ҡырғыста ҡырып бөтөрөү **2.** ышҡый-ышҡый бөтөрөү; **истере́ть рези́нку** резинканы ышҡый-ышҡый бөтөрөү **3.** (*поранить при трении*) өйкәү, ҡырыу (*аяҡты*) ♦ **истере́ть в порошо́к** *кого* көлөн күккә осороу, юҡҡа сығарыу

**ИСТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* ышҡыла-ышҡыла бөтөү (юҡҡа сығыу), ышҡылып туҙып бөтөү; **подо́шва истёрлась** табан ышҡылып туҙып бөткән

**ИСТЕ́РЗАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **истерза́ть** **2.** *прил.* (*израненный*) яраланып (имгәнеп) бөткән **3.** *прил.* йыртылып (өҙгөләнеп, таушалып) бөткән **4.** *прил.* (*изуродованный*) боҙолған, таланған, ғәрипләндерелгән, имгәтелгән; **исте́рзанная земля́** таланған ер **5.** *прил.*; *перен.* ғазапланған, йонсоған, интеккән; **исте́рзанный вид** йонсоған ҡиәфәт

**ИСТЕРЗА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** яралап бөтөрөү; **тигр истерза́л свою́ добы́чу** юлбарыҫ үҙ ҡорбанын өҙгөләп ташланы **2.** боҙоу, емерелеү, боҙоп (емереп) бөтөрөү; **исте́рзанный войно́й го́род** һуғыштан емерелеп бөткән ҡала **3.** яфалау, ғазаплау, яфалап (ғазаплап) бөтөрөү; **его́ истерза́ли сомне́ния** уны икеләнеүҙәр яфаланы

**ИСТЕ́РИК** *м* и **ИСТЕРИ́ЧКА** *ж*; *разг.* истерик, истерия менән ауырыусы, ҡыҙма кеше

**ИСТЕ́РИКА** *ж* истерика, истерия (ҡыҙма) өйәнәге; **впасть в исте́рику** истерикаға бирелеү

**ИСТЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** истерия ...ы, ҡыҙма; **истери́ческий припа́док** истерия өйәнәге **2.** истериялы, истерияға бирелеүсән, ҡыҙмаһы тотоусан; **истери́ческая же́нщина** истерияға бирелеүсән ҡатын **3.** истерияға хас, истерикалағыса (быуылып, ярһып, ҡыҙып); **истери́ческий смех** быуылып көлөү; **истери́ческие рыда́ния** ярһып илау

**ИСТЕРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **истери́ческий** 2, 3

**ИСТЕРИ́Я** *ж* истерия (**1.** *нервы өйәнәге* **2.** *күсм. ҡыҙыу эшмәкәрлек*); **вое́нная истери́я** хәрби истерия

**ИСТЕ́Ц** *м* и **ИСТИ́ЦА** *ж*; *юр.* дәғүәсе (*суд эшендә*)

**ИСТЕЧЕ́НИЕ** *с см.* **исте́чь**; **истече́ние сро́ка** срогы сығыу

**ИСТЕ́ЧЬ** *сов.* үтеү, уҙыу, бөтөү, тамамланыу, сығыу; **вре́мя истекло́** ваҡыт үтеп китте ♦ **исте́чь кро́вью** ҡанһырау, ҡан ағыу

**И́СТИНА** *ж* **1.** дөрөҫлөк, дөрөҫ; **соотве́тствовать и́стине** дөрөҫлөккә тура килеү; **узна́ть и́стину** дөрөҫөн белеү **2.** *филос.* хәҡиҡәт; **абсолю́тная и́стина** абсолют хәҡиҡәт; **объекти́вная и́стина** объектив хәҡиҡәт

**И́СТИННЫЙ,** -ая, -ое **1.** дөрөҫ, раҫ, хаҡ; **и́стинный расска́з** хаҡ һүҙ **2.** ысын; **и́стинный друг** ысын дуҫ ♦ **напра́вить (наста́вить, обрати́ть) на и́стинный путь** *кого* дөрөҫ юлға баҫтырыу

**ИСТИРА́ТЬ** *несов. см.* **истере́ть**

**ИСТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **истере́ться** **2.** *страд. от* **истира́ть**

**ИСТЛЕВА́ТЬ** *несов. см.* **истле́ть**

**ИСТЛЕ́ТЬ** *сов.* **1.** сереү, сереп бөтөү; **ткань истле́ла** тауар сереп бөткән **2.** бысҡып (янып) бөтөү, бысҡып көлгә әйләнеү; **у́гли истле́ли** ҡуҙ бысҡып көлгә әйләнгән

**ИСТО́К** *м* **1.** (һыу) башы, инеш, сығанаҡ; **исто́к реки́** йылға башы **2.** *обычно мн.* **исто́ки**; *перен.* сығанаҡ, баш, башланғыс; **исто́ки нау́ки** фән сығанағы; **исто́ки цивилиза́ции** цивилизация башланғыстары

**ИСТОЛКОВА́НИЕ** *с см.* **истолкова́ть**; **дать истолкова́ние** *чему-л. берәй нәмәгә* аңлатма биреү

**ИСТОЛКОВА́ТЕЛЬ** *м* **1.** аңлатыусы, төшөндөрөүсе **2.** юраусы

**ИСТОЛКОВА́ТЬ** *сов. что* аңлатыу, аңлатып биреү, төшөндөрөү, төшөндөрөп биреү; **истолкова́ть смысл сло́ва** һүҙҙең мәғәнәһен аңлатыу

**ИСТОЛКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **истолкова́ть**

**ИСТОЛО́ЧЬ** *сов. что* төйөп ваҡлау, ваҡлап бөтөрөү; **истоло́чь са́хар** шәкәрҙе төйөп ваҡлау

**ИСТО́МА** *ж* иҙрәү, иҙрәп төшөү, әлһерәү, ойоу; **в сла́дкой исто́ме** рәхәт ойоу хәлендә

**ИСТОМИ́ТЬ** *сов. кого-что* хәлдән тайҙырыу, талсыҡтырып (зарыҡтырып) бөтөрөү

**ИСТОМИ́ТЬСЯ** *сов.* хәлдән тайыу, талсығыу, талсығып (зарығып) бөтөү; **совсе́м истоми́ться** бөтөнләй талсығыу; **истоми́ться на рабо́те** эштә хәлдән тайыу

**ИСТОМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **истоми́ть** **2.** *прил.* хәлдән тайған, талсыҡҡан, йонсоған; **истомлённый вид** талсыҡҡан ҡиәфәт; **истомлённые пу́тники** хәлдән тайған юлсылар

**ИСТОПИ́ТЬ I** *сов. что* **1.** яғыу; **истопи́ть печь** мейес яғыу **2.** *разг.* яғып бөтөрөү; **истопи́ть весь у́голь** бөтә күмерҙе яғып бөтөрөү

**ИСТОПИ́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* иретеп бөтөрөү; **истопи́ть всё ма́сло** бөтә майҙы иретеп бөтөрөү

**ИСТОПИ́ТЬСЯ I** *сов.* (яғыуҙан) йылыныу, яғылып бөтөү

**ИСТОПИ́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* ireп бөтөү; **воск весь истопи́лся** балауыҙ ireп бөттө

**ИСТОПНИ́К** *м* и **ИСТОПНИ́ЦА** *ж* мейес яғыусы

**ИСТОПТА́ТЬ** *сов. что* **1.** тапап бөтөрөү; **истопта́ть траву́** үләнде тапап бөтөрөү **2.** *разг.* тапап бысратыу (бөтөрөү); **истопта́ть пол** иҙәнде тапап бөтөрөү **3.** *разг.* кейеп туҙҙырыу (*аяҡ кейемен*); **истопта́ть сапоги́** итекте туҙҙырыу

**ИСТОРГА́ТЬ** *несов. см.* **исто́ргнуть**

**ИСТО́РГНУТЬ** *сов. что* **1.** *уст.* бәреп сығарыу; **вулка́н исто́рг ла́ву** вулкан лава бәреп сығарҙы **2.** *перен.* сығарыу; **исто́ргнуть слёзы** күҙ йәше сығарыу; **исто́ргнуть крик** тауыш сығарыу

**ИСТОРИ́ЗМ** *м* тарихилыҡ; **при́нцип истори́зма** тарихилыҡ принцибы

**ИСТО́РИК** *м* тарихсы; **учёный-исто́рик** ғалим-тарихсы; **совеща́ние исто́риков** тарихсылар кәңәшмәһе, тарихсы ғалим

**ИСТО́РИКО-ФИЛОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тарих-филология ...ы

**ИСТОРИО́ГРАФ** *м* историография белгесе, тарихнамәсе; **вое́нный историо́граф** хәрби тарихнамәсе

**ИСТОРИОГРА́ФИЯ** *ж* историография, тарихнамә (*тарих белеменең үҫешен һәм тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнеү фәне*); **историогра́фия сове́тского пери́ода** совет осоро тарихнамәһе

**ИСТОРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** тарих ...ы; **истори́ческая нау́ка** тарих фәне **2.** тарихи; **истори́ческий докуме́нт** тарихи документ; **истори́ческая грамма́тика** тарихи грамматика; **истори́ческие места́** тарихи урындар ♦ **истори́ческий материали́зм** тарихи материализм

**ИСТОРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тарихи яҡтан дөрөҫ, тарихҡа ярашлы

**ИСТО́РИЯ** *ж* **1.** *в разн. знач.* тарих; **но́вая исто́рия** яңы тарих; **исто́рия наро́да** халыҡ тарихы; **исто́рия пе́сен** йырҙар тарихы; **зако́ны исто́рии** тарих ҡанундары **2.** ваҡиға, хәл; **попа́сть в неприя́тную исто́рию** күңелһеҙ хәлгә тарыу; **стра́шные исто́рии** ҡурҡыныс ваҡиғалар ♦ **ве́чная исто́рия** бер үк балыҡ башы; **исто́рия ума́лчивает** *о чём*; *шутл.* был турала бер ни билдәһеҙ; **войти́ в исто́рию** тарихҡа инеү

**ИСТОСКОВА́ТЬСЯ** *сов. по кому-чему* и *без доп.*; *разг.* һағыныу, зарығыу, һағынып һарғайыу; **истосковáться в ожида́нии** көтә-көтә һағынып бөтөү

**ИСТОЧА́ТЬ** *несов. что* аңҡытыу, таратыу, урғылтыу

**ИСТОЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡайрап (йоҡартып) бөтөү; **источи́ть нож** бысаҡты ҡайрап (йоҡартып) бөтөрөү **2.** *см.* **изъе́сть** 1

**ИСТО́ЧНИК** *м* **1.** шишмә, сығанаҡ; **го́рный исто́чник** тау шишмәһе; **се́рный исто́чник** көкөрт(лө) сығанағы **2.** *перен.* сығанаҡ; **исто́чник повыше́ния дохо́дов** килемде арттырыу сығанаҡтары; **исто́чник сырья́** сеймал сығанаҡтары; **исто́чник вдохнове́ния** илһам сығанағы **3.** (*письменный документ*) сығанаҡ; **пи́сьменный исто́чник** яҙма сығанаҡ; **по достове́рным исто́чникам** ышаныслы сығанаҡтар буйынса

**ИСТОЧНИКОВЕ́ДЕНИЕ** *с* сығанаҡтар өйрәнеү (*тарихи сығанаҡтарҙы өйрәнеү һәм ҡулланыу сараларын өйрәнгән фән*)

**ИСТОЧНИКОВЕ́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое сығанаҡтар өйрәнеү ...ы; **источникове́дческие рабо́ты** сығанаҡтар өйрәнеү эше

**ИСТО́ШНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* әсе, йөрәк өҙгөс (әрнеткес) (*тауыш, оран*); **исто́шный крик** әсе тауыш

**ИСТОЩА́ТЬ** *несов. см.* **истощи́ть**

**ИСТОЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **истощи́ться** **2.** *страд. от* **истоща́ть**

**ИСТОЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **истощи́ться**; **голо́дное истоще́ние** аслыҡтан ябығыу; **не́рвное истоще́ние** нервылар ҡаҡшауы **2.** (о *почве*) ярлыланыу, ашламаһы бөтөү, иҫкереү; **истоще́ние по́чвы** тупраҡтың ашламаһы бөтөү, иҫкереү **3.** әҙәйеп ҡалыу (кәмеү), наҡыҫланыу, бөтөп барыу (*тотоноу арҡаһында*); **истоще́ние средств** аҡсаның кәмеүе, бөтөп барыуы; **истоще́ние припа́сов** аҙыҡтарҙың наҡыҫланыуы

**ИСТОЩЁННОСТЬ** *ж* **1.** ябыҡлыҡ, арыҡлыҡ, хәлһеҙлек; **истощённость больно́го** ауы-

рыуҙың хәлһеҙлеге **2.** (*о почве*) (ашламаға) ярлылыҡ; **истощённость по́чвы** тупраҡтың ярлылығы

**ИСТОЩЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **истощи́ть 2.** *прил.*ябыҡ, йонсоу, хәлһеҙ, арыҡ; **истощённый челове́к** ябыҡ кеше; **истощённый вид** йонсоу төҫ **3.** *прил.* (*о почве*) уңдырышһыҙ (*тупраҡ тураһында*)

**ИСТОЩИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ябыҡтырыу, хәлһеҙләндереү, йонсотоу; **боле́знь истощи́ла его́** сир уны хәлһеҙләндерҙе (йонсотто) **2.** *что* (*о почве*) уңдырышлылығын бөтөрөү, ярлыландырыу **3.** *что* бөтөрөү, ныҡ кәметеү; **истощи́ть запа́сы** запастарҙы ныҡ кәметеү; **истощи́ть терпе́ние** түҙемлекте (сабырлыҡты) бөтөрөү

**ИСТОЩИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*изнуриться*) ябығыу, хәлһеҙләнеү, көс бөтөү, ҡаҡшау, йонсоу; **о́чень истощи́лся** ныҡ ябыҡҡан, йонсоған; **си́лы истощи́лись** көсө бөттө **2.** (*о почве*) ярлыланыу, уңдырышлылығы (ашламаһы) бөтөү; **по́чва истощи́лась** тупраҡтың уңдырышлылығы бөткән **3.** бөтөү, ҡалмау; **запа́сы желе́зной руды́ истощи́лись** тимер мәғдәненең һаҡламдары бөттө; **терпе́ние истощи́лось** түҙер хәл ҡалманы

**ИСТРА́ТИТЬ** *сов. что* **1.** тотоноп бөтөү, тотоп бөтөрөү; **истра́тить де́ньги** аҡсаны тотоноп бөтөү **2.** түгеү, һалыу, бөтөрөү, сарыф итеү; **истра́тить си́лы** көс түгеү; **истра́тить зря вре́мя** ваҡытты бушҡа сарыф итеү

**ИСТРА́ТИТЬСЯ** *сов.* **1.** тотолоп бөтөү; **де́ньги истра́тились** аҡса тотолоп бөттө **2.** *разг.* тотоноп бөтөү, аҡсаһыҙ ҡалыу; **в по́ездке я истра́тился** сәфәрҙән һуң бөтөнләй аҡсаһыҙ ҡалдым

**ИСТРЕБИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** *кого-чего* ҡырыусы, ҡырып бөтөрөүсе; **саранча́ — истреби́тель посе́вов** саранча — сәсеүлектәрҙе ҡырыусы; **истреби́тель грызуно́в** кимереүселәрҙе ҡырып бөтөрөүсе **2.** *ав.* истребитель; **реакти́вный истреби́тель** реактив истребитель ♦ **лётчик-истреби́тель** лётчик-истребитель

**ИСТРЕБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** юҡ иткес, емергес, ҡыра торған, һәләк иткес; **истреби́тельная война́** емергес һуғыш **2.** истребителдәр ...ы; **истреби́тельная авиа́ция** истребителдәр авиацияһы; **истреби́тельный отря́д** истребителдәр отряды

**ИСТРЕБИ́ТЬ** *сов. кого-что* юҡ итеү, һәләк итеү, ҡырып бөтөрөү; **истреби́ть лес** урманды ҡырып бөтөрөү

**ИСТРЕБЛЕ́НИЕ** *с см.* **истреби́ть — истребля́ть**

**ИСТРЕБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **истреби́ть**

**ИСТРЕ́БОВАНИЕ** *с*; *книжн. см.* **истре́бовать**

**ИСТРЕ́БОВАТЬ** *сов. что*; *книжн.* талап итеү, һоратып алыу; **истре́бовать де́ло из суда́** судтан эште һоратып алыу

**ИСТРЁПАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **истрепа́ть 2.** *прил.* таушалған; **истрёпанная кни́га** таушалған китап **3.** *прил.*; *перен.* йонсоған, әлһерәгән, хәлдән тайған; **истрёпанный вид** йонсоған ҡиәфәт

**ИСТРЕПА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** таушалдырып (туҙҙырып) бөтөрөү; **истрепа́ть оде́жду** кейемде туҙҙырып бөтөрөү; **истрепа́ть кни́гу** китапты таушалдырып бөтөрөү **2.** *перен.* йонсотоу, интектереү, әлһерәтеү; **бои́ истрепа́ли люде́й** һуғыш кешеләрҙе йонсотто ♦ **истрепа́ть не́рвы** нервыны ҡаҡшатыу

**ИСТРЕПА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* туҙып (таушалып) бөтөү; **оде́жда истрепа́лась** кейем туҙып бөттө **2.** *перен.*, *прост.* йонсоу, интегеү, әлһерәү, арыу

**ИСТРЕ́СКАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ярылып (сатнап) бөтөү; **кра́ска истре́скалась** буяуы ярылып бөткән

**ИСТУКА́Н** *м* **1.** (*изваяние*) тораташ, бот, һын **2.** *бран.* күҙле бүкән ♦ **стоя́ть как истука́н**; **стоя́ть истука́ном** бағана (таш) кеүек ҡатып ҡалыу

**ИСТУПИ́ТЬ** *сов. что* үтмәҫләп бөтөрөү; **иступи́ть нож** бысаҡты үтмәҫләп бөтөрөү

**ИСТУПИ́ТЬСЯ** *сов.* үтмәҫләнеп бөтөү; **коса́ иступи́лась** салғы үтмәҫләнеп бөткән

**И́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ысын; **и́стый учёный** ысын ғалим **2.** тырыш, эш яратыусы; **и́стый рабо́тник** тырыш эшсе

**ИСТЫ́КАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* сәнскеләп (тишкеләп, ҡаҙап) бөтөрөү; **исты́кать иго́лкой** энә менән сәнскеләп бөтөрөү; **исты́кать кно́пками** ҡаҙауыстар менән тишкеләп бөтөрөү

**ИСТЯЗА́НИЕ** *с см.* **истяза́ть**; **подве́ргнуть истяза́ниям** ғазаплауға дусар итеү

**ИСТЯЗА́ТЕЛЬ** *м* ғазаплаусы, интектереүсе, яфалаусы

**ИСТЯЗА́ТЬ** *несов. кого-что* ныҡ ғазаплау (интектереү), аяуһыҙ яфалау; **истяза́ть живо́тное** хайуанды ныҡ интектереү

**ИСХЛЕСТА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *кого-что* һуҡтырыу, һыҙырыу, ҡамсылау; **исхлеста́л его́ спи́ну кнуто́м** уның арҡаһын ҡамсы менән һыҙырҙы **2.** (*истрепать*) туҙҙырыу, туҙҙырып бөтөрөү; **исхлеста́ть ве́ник** һеперткене туҙҙырыу

**ИСХЛЁСТЫВАТЬ** *несов. см.* **исхлеста́ть**

**ИСХЛОПОТА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* юллап алыу; **исхлопота́ть разреше́ние** рөхсәт юллап алыу

**ИСХО́Д** *м* **1.** юл, сара; **еди́нственный исхо́д** берҙән-бер юл **2.** аҙаҡ, ахыр, бөтөү; **на исхо́де дня** көн аҙағында; **как бы исхо́д э́того де́ла не был плаче́вным** был эштең аҙағы насар булмаһын инде **3.** һөҙөмтә, нәтижә; **исхо́д де́ла** эштең һөҙөмтәһе; **исхо́д выборо́в** һайлауҙар нәтижәһе ♦ **в исхо́де** аҙағында; **на исхо́де** һуңында, бөтөү алдында; **де́ньги на исхо́де** аҡса

бөтөп бара; **быть на исхо́де** бөтөп барыу; **еда́ была́ на исхо́де** аҙыҡ бөтөп бара ине

**ИСХОДА́ТАЙСТВОВАТЬ** *сов. что*; *книжн.* юллап алыу; **исхода́тайствовать пе́нсию** пенсия юллап алыу

**ИСХОДИ́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* (йәйәү) йөрөп сығыу, ҡыҙырып сығыу; **исходи́ть весь го́род** бөтә ҡаланы йөрөп сығыу

**ИСХОДИ́ТЬ II** *несов.* **1.** *от кого, из чего*; *уст., книжн.* сығыу, алыныу; **две прямы́е исхо́дят из одно́й и той же то́чки** ике тура һыҙыҡ (та) бер үк нөктәнән сыға; **э́ти све́дения исхо́дят из достове́рных исто́чников** был мәғлүмәттәр ышаныслы сығанаҡтан алынған **2.** *из чего* -дан/-дән сығыу (сығып эш итеү); **исходи́ть из реше́ния собра́ния** йыйылыш ҡарарынан сығып эш итеү

**ИСХОДИ́ТЬ III** *несов. см.* **изойти́**

**ИСХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое баштағы, тәүге; **исхо́дный пункт** тәүге пункт; **исхо́дные то́чки зре́ния** баштағы ҡараш

**ИСХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **исходи́ть** II; **2.** *прил.* ебәрелә (сыға) торған (*учреждениенан һ.б.*); **исходя́щая по́чта** ебәрелә торған почта; **исходя́щая кни́га** *спец.* сығым кенәгәһе

**ИСХУДА́ЛЫЙ,** -ая, -ое ныҡ арыҡ (ябыҡ), элмәйгән; **исхуда́лые ру́ки** ныҡябыҡ ҡулдар

**ИСХУДА́ТЬ** *сов.* ныҡябығыу, арыҡланыу, элмәйеп ҡалыу; **он исхуда́л за вре́мя боле́зни** ауырыған саҡта ул ныҡябыҡты

**ИСЦАРА́ПАТЬ** *сов. кого-что* тырнап (сыйып) бөтөрөү; **все ру́ки бы́ли исцара́паны** ҡулдары тырналып бөткәйне

**ИСЦАРА́ПАТЬСЯ** *сов.* тырналып (сыйылып) бөтөү

**ИСЦАРА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **исцара́пать**

**ИСЦЕЛЕ́НИЕ** *с см.* **исцели́ть** — **исцеля́ть**; **исцели́ться** — **исцеля́ться**

**ИСЦЕЛИ́ТЕЛЬ** *м*; *книжн.* һауыҡтырыусы, сәләмәтләндереүсе

**ИСЦЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *книжн.* һауыҡтырыу, сәләмәтләндереү; **исцели́ть больно́го** ауырыуҙы һауыҡтырыу

**ИСЦЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *книжн.* һауығыу, сәләмәтләнеү; **больно́й исцели́тся** ауырыу һауығасаҡ

**ИСЦЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **исцели́ть**

**ИСЦЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **исцели́ться 2.** *страд. от* **исцеля́ть**

**ИСЧА́ДИЕ: исча́дие а́да** *книжн.* тамуҡ киҫәүе; **исча́дие сатаны́** *книжн.* иблис тоҡомо

**ИСЧЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **исче́знуть**

**ИСЧЕЗНОВЕ́НИЕ** *с см.* **исче́знуть**

**ИСЧЕ́ЗНУТЬ** *сов.* юғалыу, юҡ булыу, юҡҡа сығыу, юйылыу; **к утру́ тума́н исче́з** иртән томан юҡ булды; **исче́знуть из па́мяти** хәтерҙән юйылыу; **исче́знуть на глаза́х** күҙ менән ҡаш араһында (күҙ алдында) юҡ булыу; **исче́знуть в темноте́** ҡараңғыға инеп юғалыу; **каранда́ш исче́з** ҡәләм юғалды; **исче́знуть бессле́дно** эҙһеҙ юғалыу

**ИСЧЕРКА́ТЬ** и **ИСЧЁРКАТЬ** *сов. что*; *разг.* һыҙғылау, һыҙғылап бөтөү; **исчерка́ть бума́гу** ҡағыҙҙы һыҙғылап бөтөү

**ИСЧЕ́РПАТЬ** *сов. что* **1.** тотоп бөтөрөү, файҙаланып (сарыф итеп) бөтөү; **исче́рпать все возмо́жности** бөтә мөмкинлекте файҙаланып бөтөү **2.** ҡарап бөтөрөү, тамамлау; **исче́рпать пове́стку дня заседа́ния** ултырыштың көн тәртибен ҡарап бөтөрөү; **исче́рпать програ́мму** программаны тамамлау

**ИСЧЕ́РПЫВАТЬ** *несов. см.* **исче́рпать**

**ИСЧЕ́РПЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **исче́рпывать 2.** *прил.* тулы; **исче́рпывающий отве́т** тулы яуап; **исче́рпывающая оце́нка** тулы баһа

**ИСЧЕРТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һыҙғылау, сыйғыслау, һыҙғылап (сыйғыслап) бөтөрөү (*ҡағыҙҙы*) **2.** *разг.* һыҙып (тотоноп) бөтөрөү (*ҡәләмде, аҡбурҙы*); **исчерти́ть весь мел** һыҙа-һыҙа аҡбурҙы бөтөрөү

**ИСЧЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **исчерти́ть**

**ИСЧИ́РКАТЬ** *сов. что*; *разг.* сыйып (һыҙып) бөтөрөү (*шырпыны*); **исчи́ркать коробо́к спи́чек** бер ҡап шырпыны сыйып бөтөрөү

**ИСЧИСЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **исчи́слить** — **исчисля́ть 2.** *мат.* иҫәпләмә (*юғары математикала*); **дифференциа́льное исчисле́ние** дифференциаль иҫәпләмә; **интегра́льное исчисле́ние** интеграль иҫәпләмә

**ИСЧИ́СЛИТЬ** *сов. что* иҫәпләү, иҫәпләп сығарыу; **исчи́слить расхо́ды** сығымды иҫәпләү; **исчи́слить в гекта́рах** гектар менән иҫәпләү; **исчи́слить в ме́трах** метр менән иҫәпләү

**ИСЧИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **исчи́слить**

**ИСЧИСЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** иҫәпләнеү, һаналыу; **дохо́ды исчисля́ются ты́сячами рубле́й** килем меңәр һум менән иҫәпләнә **2.** *страд. от* **исчисля́ть**

**ИТА́К** *союз* (*употребляется в начале предложения, содержащего вывод из предыдущего*) тимәк, шулай итеп; **ита́к, вопро́с решён** шулай итеп, мәсьәлә хәл ителде; **ита́к, тепе́рь всё я́сно** шулай итеп, хәҙер бөтәһе лә аңлашылды

**ИТАЛЬЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое итальян ...ы, Италия ...ы; **италья́нский наро́д** Италия халҡы; **италья́нская пе́сня** итальян йыры; **италья́нский язы́к** итальян теле ♦ **италья́нское окно́** өс-дүрт ҡапҡаслы киң тәҙрә

**ИТАЛЬЯ́НЦЫ** *мн.* итальяндар, итальян халҡы // *ед.* **италья́нец** *м* итальян ир-аты; **италья́нка** *ж* итальян ҡатын-ҡыҙы

**ИТЕЛЬМЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое ителмән ...ы; **ительме́нская культу́ра** ителмән мәҙәниәте; **ительме́нский язы́к** ителмән теле

**ИТЕЛЬМЕ́НЫ** *мн.* ителмәндәр (*Камчатканың төп халҡы*) // *ед.* **ительме́н** *м* ителмән ир-аты; **ительме́нка** *ж* ителмән ҡатын-ҡыҙы

**ИТО́Г** *м* **1.** *бухг.* (*общая сумма*) барлығы, барыһы, йәмғеһе **2.** йомғаҡ; **ито́ги перегово́ров** һөйләшеү йомғаҡтары; **ито́ги уче́бного го́да** уҡыу йылының йомғаҡтары ♦ **в ито́ге** һөҙөмтәлә

**ИТОГО́** *нареч.* барлығы, бөтәһе, йыйыныһы, бөтөнөһө, йәмғеһе; **итого́ в су́мме ты́сяча рубле́й** барлығы мең һум

**ИТО́ГОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** дөйөм, барлыҡ, бөтөн; **ито́говые да́нные** дөйөм мәғлүмәттәр; **ито́говые ци́фры** дөйөм һандар **2.** йомғаҡлау …ы; **ито́говые заня́тия** йомғаҡлау дәрестәре

**ИТО́ЖИТЬ** *несов. что* **1.** *бухг.* дөйөм сумманы иҫәпләү **2.** *разг.* йомғаҡлау, һығымта яһау

**ИТО́ЖИТЬСЯ** *несов. страд. от* **ито́жить**

**ИУ́ДА** *м*; *бран.* хыянатсы, һатлыҡ

**ИУДАИ́ЗМ** *м* иудаизм (*дин төрө — йәһүдтәрҙә*)

**ИУДЕ́И** *мн.* йәһүдтәр, йәһүд халҡы // *ед.* **иуде́й** *м* йәһүд ир-аты; **иуде́йка** *ж* йәһүд ҡатын-ҡыҙы

**ИУДЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое йәһүд …ы; **иуде́йская рели́гия** йәһүд дине

**ИУДЕ́ЙСТВО** *с* **1.** йәһүд дине **2.** *собир.* йәһүдтәр

**ИХТИОЗА́ВР** *м* ихтиозавр (*ҡаҙылдыҡ диңгеҙ хайуаны*); **скеле́т ихтиоза́вра** ихтиозавр һөлдәһе

**ИХТИО́Л** *м* ихтиол (*ҡара төҫтәге май һымаҡ дарыу*)

**ИХТИО́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое ихтиол …ы; **ихтио́ловая мазь** ихтиол майы; **ихтио́ловое мы́ло** ихтиол һабыны

**ИХТИО́ЛОГ** *м* ихтиолог, ихтиология белгесе

**ИХТИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ихтиология …ы; **ихтиологи́ческие колле́кции** ихтиология коллекциялары (йыйылмалары); **ихтиологи́ческий отде́л музе́я** музейҙың ихтиология бүлеге

**ИХТИОЛО́ГИЯ** *ж* ихтиология (*зоологияның балыҡтарҙы өйрәнеү бүлеге*)

**И́ЧИГИ** *мн.* (*ед.* **и́чиг** *м*); *обл.* ситек; **обува́ть и́чиги** ситек кейеү

**ИША́К** *м* ишәк

**ИША́ЧИЙ,** -ья, -ье ишәк …ы; **иша́чий крик** ишәк тауышы

**И́ШИАС** *м*; *мед.* ишиас, янбаш һыҙлау

**ИШЬ** *частица*; *прост.* (*при выражении удивления, неудовольствия и для указания на что-л.*) ҡара, ҡара һин уны; **ишь ты како́й** ҡара һин уны, нисегерәк; **ишь, как бы́стро рабо́тает** ҡара, нисек тиҙ эшләй

**ИЩЕ́ЙКА** *ж* **1.** эҙәрләүсе эт **2.** *перен.*, *разг.*, *пренебр.* шымсы

**ИЮ́ЛЬ** *м* июль; **пе́рвое ию́ля** беренсе июль

**ИЮ́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое июль …ы; **ию́льский ве́чер** июль кисе; **ию́льские дожди́** июль ямғырҙары, июлдәге ямғырҙар

**ИЮ́НЬ** *м* июнь; **пя́тое ию́ня** бишенсе июнь

**ИЮ́НЬСКИЙ,** -ая, -ое июнь …ы; **в ию́ньские дни** июнь көндәрендә

# К

**К** и **КО** *предлог с дат. п.* **1.** (*при обозначении направленности действия в сторону кого-чего-л.*) -ға/-гә (табан); **подъе́хать к ста́нции** станцияға килеп етеү; **он пришёл ко мне** ул миңә килде; **плыть к бе́регу** ярға табан йөҙөү

**2.** (*при обозначении времени, срока*) -ға/-гә (табан); **к пе́рвому января́** беренсе ғинуарға; **к ве́черу** кискә табан

**3.** (*при обозначении цели, назначения*) -ға/-гә; **приучи́ть к поря́дку** тәртипкә өйрәтеү; **гото́виться к сва́дьбе** туйға әҙерләнеү

**4.** (*при обозначении прибавления, присоединения, прикрепления*) -ға/-гә; **прикрепи́ть к стене́** стенаға беркетеп ҡуйыу; **к трём приба́вить два** өскә икене ҡушыу; **присоедини́ться к большинству́** күпселеккә ҡушылыу; **к тому́ же** өҫтәүенә

**5.** (*при указании на предмет, лицо, с которым связано действие*) -ға/-гә; **любо́вь к ро́дине** ватанға (булған) мөхәббәт; **не́нависть к врага́м** дошманға (булған) нәфрәт

**6.** (*при указании на соответствие чему-л.*) -лы/-ле, -ға/-гә; **приго́дный к употребле́нию** файҙаланыуға яраҡлы; **го́дный к во́инской слу́жбе** хәрби хеҙмәткә яраҡлы; **говори́ть к ме́сту** урынлы әйтеү; **не ко вре́мени** ваҡытһыҙ

**7.** (*в заглавиях*) -на/-нә ҡарата; **к вопро́су о происхожде́нии языка́** телдең килеп сығышына ҡарата

**8.** (*в призывах*) -ға/-гә; **к правово́му госуда́рству!** хоҡуҡи дәүләткә!; **к отве́ту!** яуапҡа!

**9.** (*во вводных словах и выражениях*) -ға/-гә ҡаршы; **к сожале́нию** ҡыҙғаныуға ҡаршы; **к несча́стью** бәхетһеҙлеккә ҡаршы; ♦ **к приме́ру** миҫал итеп, миҫалға; **к чему́** нимәгә; **к тому́ же** шуның өҫтөнә, өҫтәүенә

**-КА** *частица*; *разг.* **1.** (*при повелительном накл. для смягчения просьбы, приказания*)

-сы/-се (әле); **скажи́те-ка мне** әйтегеҙсе миңә; **да́йте-ка пройти́** үткәреп ебәрегеҙ(се) әле

**2.** (*с глаголами будущего времени для выражения внезапности желания*) әле; **куплю́-ка я э́ту кни́гу** был китапты һатып алайым әле

**КАБА́К** *м*; *уст.* ҡабаҡ (*революцияға тиклем Рәсәйҙә эскелек урыны*)

**КАБАЛА́** *ж* **1.** *ист.* кабала (*мәжбүри бурыс*); **заёмная кабала́** заём кабалаһы **2.** *ист.* кабала, ғүмерлек ҡоллоҡ **3.** *перен.* бойондороҡлоҡ; **попа́сть в кабалу́** бойондороҡлоҡҡа эләгеү; **держа́ть в кабале́** бойондороҡлоҡта тотоу

**КАБАЛИ́СТИКА** и **КАББАЛИ́СТИКА** *ж* кабалистика (**1.** *урта быуаттарҙа юҡ-барға ышаныу, дини-мистик тәғлимәт һәм ғөрөф-ғәҙәттәр* **2.** *күсм. махсус мәғәнәгә эйә булған, әммә белмәгән, таныш булмаған кешегә аңлайышһыҙ нәмә*)

**КАБАЛИ́ТЬ** *несов., кого-что*; *ист.* ҡол итеү, ҡоллоҡҡа төшөрөү; **кабали́ть крестья́н** крәҫтиәндәрҙе ҡоллоҡҡа төшөрөү

**КАБА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *ист.* кабала ...ы; **каба́льная за́пись** кабала яҙмаһы; **каба́льная зави́симость** кабала бойондороҡлоғо **2.** *ист.* кабалалағы, кабалаға бәйле; **каба́льные холо́пы** кабалалағы хеҙмәтселәр **3.** *перен.* кабалалы, ауыр; **каба́льный догово́р** кабалалы килешеү

**КАБА́Н** *м* **1.** (*дикий*) ҡабан **2.** (*самец домашней свиньи*) ата суҫҡа

**КАБА́НИЙ,** -ья, -ье ҡабан ...ы; **каба́ний клык** ҡабан теше; **каба́нье ста́до** ҡабан көтөүе

**КАБАНИ́НА** *ж* ҡабан ите

**КАБАРГА́** *ж* кабарга (*болан*)

**КАБАРГО́ВЫЙ,** -ая, -ое кабарга ...ы; **кабарго́вая шку́ра** кабарга тиреһе

**КАБАРДИ́НКА** *ж* кабардинка (**1.** *кейем* **2.** *бейеү*)

**КАБАРДИ́НСКИЙ,** -ая, -ое кабардин ...ы; **кабарди́нский язы́к** кабардин теле; **кабарди́нская поро́да лошаде́й** кабардин аты (*тоҡомо*)

**КАБАРДИ́НЦЫ** *мн.* кабардиндар, кабардин халҡы // *ед.* **кабарди́нец** *м* кабардин ир-аты; **кабарди́нка** *ж* кабардин ҡатын-ҡыҙы

**КАБАРЕ́** *с нескл.* кабаре (*төрлө уйын-сәнғәт күрһәтә торған эстрадалы ресторан йәки кафе*)

**КАБАЧКО́ВЫЙ,** -ая, -ое таш ҡабаҡ ...ы; **кабачко́вая икра́** таш ҡабаҡ икраһы

**КАБАЧО́К I** *м*; *уменьш. от* **каба́к**

**КАБАЧО́К II** *м* таш ҡабаҡ (*йәшелсә төрө*)

**КА́БЕЛЬ** *м* кабель; **телефо́нный ка́бель** телефон кабеле

**КА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кабель ...ы; **ка́бельная ли́ния** кабель линияһы (һыҙымы)

**КАБИ́НА** *ж* кабина; **каби́на шофёра** шофёр кабинаһы; **каби́на для перегово́ров по телефо́ну** телефондан һөйләшеү кабинаһы; **душева́я каби́на** душта йыуыныу кабинаһы

**КАБИНЕ́Т** *м*; *в разн. знач.* кабинет; **кабине́т заве́дующего** мөдир кабинеты; **зубовраче́бный кабине́т** теш врачы (табибы) кабинеты; **Кабине́т мини́стров** Министрҙар кабинеты

**КАБИНЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое кабинет ...ы; **кабине́тная ме́бель** кабинет мебеле; **кабине́тная систе́ма обуче́ния** кабинетта уҡытыу системаһы

**КАБЛОГРА́ММА** *ж*; *спец.* каблограмма (*һыу аҫты кабеле буйынса бирелә торған телеграмма*)

**КАБЛУ́К** *м* үксә; **ни́зкий каблу́к** тәпәш үксә; **ту́фли на высо́ком каблуке́** бейек үксәле туфли ♦ **под каблуко́м** *кого* олтораҡ булыу (*кемдеңдер ихтыярына тулыһынса буйһоноу*)

**КАБЛУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое үксә ...ы; **каблу́чный стано́к** үксә станогы; **каблу́чный гвоздь** үксә нығыта торған ҡаҙаҡ

**КАБОТА́Ж** *м*; *мор.* каботаж (*бер илдең порттары араһында караптарҙа йөҙөү*); **большо́й кабота́ж** ҙур каботаж (*төрлө диңгеҙ порттары араһында*); **ма́лый кабота́ж** бәләкәй каботаж (*бер диңгеҙҙең порттары араһында*)

**КАБРИОЛЕ́Т** *м* кабриолет (**1.** *ике тәгәрмәсле еңел арба* **2.** *еңел автомобилдең асылмалы кузовы*)

**КАВАЛЕ́Р I** *м* кавалер (**1.** *ҡатын-ҡыҙға илтифат күрһәтеп, уның кәйефен табырға тырышыусы ир-егет* **2.** *ҡатын-ҡыҙ менән парлы бейеүҙә бейегән ир-ат*)

**КАВАЛЕ́Р II** *м* кавалер (*орден менән бүләкләнгән кеше*); **кавале́р о́рдена Оте́чественной войны́** Ватан һуғышы ордены кавалеры

**КАВАЛЕРГА́РД** *м* кавалергард (*ғәскәрендә махсус атлы гвардия полкында хеҙмәт иткән һалдат йәки офицер*)

**КАВАЛЕРИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое кавалерия ...ы; **кавалери́йская ата́ка** кавалерия һөжүме

**КАВАЛЕРИ́СТ** *м* кавалерист

**КАВАЛЕ́РИЯ** *ж* кавалерия, атлы ғәскәр; **лёгкая кавале́рия** еңел кавалерия

**КАВАЛЬКА́ДА** *ж* кавалькада, һыбайлылар төркөмө

**КАВАРДА́К** *м*; *разг.* буталсыҡлыҡ, ығы-зығы, тәртипһеҙлек; **по́лный каварда́к** ныҡ буталсыҡлыҡ

**КАВАТИ́НА** *ж*; *муз.* каватина (*опера арияһының лирик төрө*)

**КА́ВЕРЗА** *ж*; *разг.* мәкер, хәйлә; **стро́ить ка́верзы** хәйлә ҡороу

**КА́ВЕРЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** мәкерле, хәйләле; **ка́верзный челове́к** мәкерле кеше **2.** буталсыҡ, ҡатмарлы, хәйләле; **ка́верзное де́ло** буталсыҡ эш; **ка́верзный вопро́с** хәйләле һорау

**КАВЕ́РНА** *ж* **1.** *мед.* каверна (*берәй ауырыу тәьҫирендә организмдың тарҡалыуынан барлыҡҡа килгән бушлыҡ*); **каве́рна в лёгких** үпкә кавернаһы **2.** *геол.* ҡыуышлыҡ, бушлыҡ; **каве́рна в песча́нике** ҡомташтағы бушлыҡ

**КАВЕРНО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *мед.* каверналы; **каверно́зное лёгкое** каверналы үпкә **2.** *геол.* ҡыуышлы; **каверно́зный известня́к** ҡыуышлы бурташ

**КАВКА́ЗСКИЙ,** -ая, -ое Кавказ ...ы; **кавка́зские языки́** Кавказ телдәре ♦ **кавка́зский то́поль** кавказ тирәге; **кавка́зский клино́к** кавказ ҡылысы

**КАВКА́ЗЦЫ** *мн.* кавказлылар, Кавказ халҡы // *ед.* **кавка́зец** *м* Кавказ ир-аты; **кавка́зка** *ж* Кавказ ҡатын-ҡыҙы

**КАВЫ́ЧКИ** *мн.* (*ед.* **кавы́чка** *ж*) тырнаҡтар; **слова́ в кавы́чках** тырнаҡтар эсендәге һүҙҙәр; **откры́ть кавы́чки** тырнаҡтарҙы асыу; **закры́ть кавы́чки** тырнаҡтарҙы ябыу ♦ **в кавы́чках** *ирон.* һүҙҙә генә

**КАГА́Н** *м*; *ист.* ҡаған (*урта быуаттарҙа төрки дәүләте башлығы*)

**КАГАНА́Т** *м* ҡағанат, ҡағанлыҡ; **Тю́ркский кагана́т** Төрки ҡағанлығы

**КАГА́Т** *м*; *с.-х.* кагат (*ҡышҡылыҡҡа ергә өйөп, ҡаплап ҡуйылған картуф, кишер, сөгөлдөр өйөмө*)

**КАГО́Р** *м* кагор (*ҡыҙыл шарап төрө*)

**КАДЕ́Т I** *м*; *уст.* кадет (*кадет корпусында уҡыусы*)

**КАДЕ́Т II** *м*; *полит.* кадет (*Рәсәйҙә конституцион-демократик фирҡә ағзаһы*)

**КАДЕ́ТСКИЙ I,** -ая, -ое *уст.* кадет ...ы; **каде́тский мунди́р** кадет мундиры ♦ **каде́тский ко́рпус** кадеттар корпусы (*хәрби урта мәктәп*)

**КАДЕ́ТСКИЙ II,** -ая, -ое *полит.* кадеттар ...ы; **каде́тская па́ртия** кадеттар фирҡәһе

**КА́ДИ** *м нескл.* ҡазый

**КАДИ́ЛО** *с*; *церк.* кадило (*сиркәүҙә яндырып төтәсләй торған хуш еҫле ыҫмала һалынған тимер һауыт*)

**КАДИ́ТЬ** *несов.* **1.** кадило менән ыҫлау, төтәсләү **2.** *кому*; *перен.* (*льстить*) ярамһаҡланыу

**КА́ДКА** *ж* тәпән, сапсаҡ

**КА́ДМИЙ** *м* кадмий (**1.** *химик элемент, ялтырауыҡлы йомшаҡ аҡ металл* **2.** *шул металдан яһалған һары буяу*)

**КАДР** *м* кадр (**1.** *кино йәки фотоплёнкалағы айырым һүрәт* **2.** *кинофильмдан айырым күренеш йәки эпизод*) ♦ **за ка́дром** кадр артында

**КАДРИ́ЛЬ** *ж* кадриль (*алтышар фигуранан торған парлы күмәк бейеү һәм шуға яҙылған музыка әҫәре*)

**КАДРОВИ́К** *м*; *разг.* кадровик (**1.** *кадрҙарға, төп составҡа ингән кеше* **2.** *кадрҙар бүлеге хеҙмәткәре*)

**КА́ДРОВЫЙ,** -ая, -ое кадрҙағы, даими төп составтағы; **ка́дровые войска́** даими ғәскәр; **ка́дровый офице́р** кадрҙағы офицер; **ка́дровый рабо́чий** төп эшсе

**КА́ДРЫ** *только мн.* кадрҙар (**1.** *хәрби частарҙың тыныс ваҡыттағы даими составы* **2.** *ойошмаларҙа, предприятиеларҙа эшләүселәрҙең төп составы*) ♦ **отде́л ка́дров** кадрҙар бүлеге

**КАДУ́ШКА** *ж* бәләкәй (сапсаҡ) тәпән, ағас күнәк

**КАДЫ́К** *м* күмәгәй

**КАЁМКА** *ж*; *разг.* нәҙек ҡайма

**КАЖДОДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое һәр көнгө, көндәлек; **каждодне́вная рабо́та** көндәлек эш

**КА́ЖДЫЙ,** -ая, -ое *мест.* **1.** һәр, һайын, һәр бер, һәр ҡайһы; **ка́ждый ме́сяц** һәр ай, ай һайын; **ка́ждый год** йыл һайын **2.** *в знач. сущ.* **ка́ждый** *м* и **ка́ждая** *ж* һәр кем; **э́то до́лжен знать ка́ждый** быны һәр кем белергә тейеш ♦ **на ка́ждом шагу́** аҙым һайын, һәр аҙымда

**КАЗА́К** *м* казак ир-аты; **каза́чка** *ж* казак ҡатын-ҡыҙы (**1.** *Рәсәйҙә XV–XVII бб. Яйыҡ, Дон, Кубань буйҙарына ҡаҫҡан крәҫтиәндәрҙән, ҡала ярлыларынан торған ирекле кеше* **2.** *шуларҙан ойошҡан, XVIII б. Урыҫ дәүләтенең сик буйҙарын һаҡларға тейеш булған айырым хәрби сословие вәкиле*); **донски́е казаки́** Дон казактары ♦ **во́льный каза́к** үҙ иркендә (*ирекле кеше*)

**КАЗАКИ́Н** *м* кәзәкей (*кейем*)

**КАЗА́Н** *м*; *обл.* ҡаҙан

**КАЗА́РКА** *ж* ҡарағаҙ

**КАЗА́РМА** *ж* казарма

**КАЗА́РМЕННЫЙ,** -ая, -ое казарма ...ы; **каза́рменная жизнь** казарма тормошо ♦ **каза́рменное положе́ние**; **каза́рменный режи́м** казарма хәле (режимы)

**КАЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *кем-чем* күренеү, тойолоу; **каза́ться ста́рше свои́х лет** төҫкә оло күренеү **2.** *кому безл.* (*представляться*) -дай/-дәй булыу, кеүек күренеү (тойолоу); **мне ка́жется, что я где́-то ви́дел его́** мин уны ҡайҙалыр күргәндәй булам **3.** *в знач. вводн. сл.* **ка́жется** буғай, ахыры, төҫлө, булһа кәрәк; **он, ка́жется, уе́хал** ул киткән, буғай

**КАЗА́ХИ** *мн.* ҡаҙаҡтар, ҡаҙаҡ халҡы // *ед.* **каза́х** *м* ҡаҙаҡ ир-аты; **каза́шка** *ж* ҡаҙаҡ ҡатын-ҡыҙы

**КАЗА́ХСКИЙ,** -ая, -ое ҡаҙаҡ ...ы; **каза́хский язы́к** ҡаҙаҡ теле; **каза́хские сте́пи** ҡаҙаҡ далалары

**КАЗА́ЦКИЙ,** -ая, -ое казак ...ы; **каза́цкая са́бля** казак ҡылысы

**КАЗА́ЧЕСТВО** *с* **1.** казак ҡатламы **2.** *собир.* казактар; **донско́е каза́чество** Дон казактары

**КАЗА́ЧИЙ,** -ья, -ье казак ...ы; **каза́чьи пе́сни** казак йырҙары; **каза́чий атама́н** казак атаманы

**КАЗАЧО́К** *м* **1.** *уменьш.-ласк.* *от* **каза́к** **2.** *уст.* казачок (*хеҙмәтсе малай*) **3.** казачок (*тиҙләнешле бейеү һәм шул бейеүҙең көйө*)

**КАЗЕИ́Н** *м* казеин (*һөт составындағы аҡһым матдә*)

**КАЗЕЙНОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** казеин ...ы; **казе́йновый заво́д** казеин заводы **2.** казеинлы, казеиндан яһалған; **казе́йновый клей** казеиндан яһалған елем; **казе́йновые кра́ски** казеинлы буяуҙар

**КАЗЕМА́Т** *м* каземат (**1.** *хәрб. артиллерия һәм авиация утынан һаҡланыу өсөн бетон ҡоролма* **2.** *төрмә камераһы*)

**КАЗЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* ҡаҙна ...ы, хөкүмәт ...ы; **казённые зе́мли** ҡаҙна ерҙәре; **казённая кварти́ра** хөкүмәт фатиры **2.** өҫтән генә, бюрократтарса; **казённый подхо́д к де́лу** эшкә өҫтән генә ҡарау **3.** *перен.* ҡоро, йәнһеҙ, ғәҙәти; **казённый стиль** ҡоро стиль ♦ **казённые крестья́не** ҡаҙна крәҫтиәндәре (*XVIII—XIX бб. Рәсәйҙә хөкүмәткә ҡараған крепостной крәҫтиәндәр*); **Казённая пала́та** Ҡаҙна палатаһы (*революцияға тиклем Рәсәй губерналарында аҡсалата һалым йыйыу эше менән идара иткән орган*); **казённая часть** *спец.* мылтыҡ (туп) көбәгенең ҡора торған өлөшө

**КАЗЁНЩИНА** *ж*; *разг.* ҡоро формаллек, формализм; **газе́тная казёнщина** гәзиттәрҙең ҡоро формаллеге

**КАЗИНО́** *с нескл.* казино (*ҡомарлы уйын уйнау өсөн тәғәйенләнгән йорт, шулай уҡ ресторанда күңел асыу урыны*)

**КАЗНА́** *ж*; *уст.* **1.** (*государственное имущество*) ҡаҙна, дәүләт **2.** (*государство*) дәүләт, хөкүмәт; **зе́мли отошли́ к казне́** ерҙәр дәүләткә күсте **3.** (*деньги, имущество*) аҡса, хазина; **награжда́ть казно́й** аҡса менән бүләкләү

**КАЗНАЧЕ́Й** *м* казначей (*ойошма, учреждениелар аҡсаһын һәм ҡиммәтле ҡағыҙҙарын һаҡлаусы*); **казначе́й ме́стного коми́тета** урындағы комитет казначейы

**КАЗНАЧЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое казначей ...ы; **казначе́йская до́лжность** казначей вазифаһы ♦ **казначе́йские биле́ты** казначей билеттары (*алтынға әйләндерелмәй торған ваҡ ҡағыҙ аҡсалар исеме*)

**КАЗНАЧЕ́ЙСТВО** *с* казначейство (*дәүләт килемдәрен йыйыу, һаҡлау һәм бүлеү эштәрен алып барған дәүләт финанс органы*)

**КАЗНИ́ТЬ** *сов., несов.* **1.** *кого* язалау, язаға тарттырыу **2.** *чем* и *без доп.*; *перен.* (*мучить*) ғазаплау, яфалау, интектереү; **казни́ть презре́нием** *кого-л. кемделер* нәфрәтле ҡараш (мөнәсәбәт) менән яфалау

**КАЗНИ́ТЬСЯ** *несов.* ғазапланыу, борсолоу

**КАЗНОКРА́Д** *м*; *уст.* ҡаҙна талаусы, дәүләт милкен үҙләштереүсе

**КАЗНОКРА́ДСТВО** *с*; *уст.* ҡаҙна талау, дәүләт милкен үҙләштереү

**КАЗНЬ** *ж* **1.** үлем язаһы; **сме́ртная казнь** үлем язаһы **2.** *перен.* (*страдание*) ғазап, яфа

**КАЗУИ́СТ** *м* **1.** *юр.* казуист, оҫта юрист **2.** *перен.* казуист, шымарған бәхәссе (*бәхәс ваҡытында ялған йәки шикле дәлилдәрҙе оҫта файҙаланыусы кеше*)

**КАЗУИ́СТИКА** *ж* казуистика (**1.** *юр. закондың дөйөм статьяларын төрлө юридик хәлдәрҙә ҡулланыу* **2.** *урта быуаттар дәүерендәге схоластикала һәм дини тәғлимәттә ҡулланылған ысул, йәғни, һирәк осраған фактарҙы йомғаҡлап, дөйөм ҡағиҙәгә индереү* **3.** *күсм. ялған йәки шикле фекерҙәрҙе дәлилләүҙә оҫталыҡ*)

**КА́ЗУС** *м* **1.** *юр.* казус (*судта ҡатмарлы, буталсыҡ эш*) **2.** *разг.* ғәжәп ваҡиға, әкәмәт хәл; **произошёл ка́зус** бер әкәмәт хәл булды

**КА́ЗУСНЫЙ,** -ая, -ое ҡатмарлы, буталсыҡ (*суд эштәренә ҡарата*); **ка́зусное де́ло о башки́рских зе́млях** башҡорт ерҙәре тураһындағы ҡатмарлы эш (хәл)

**КА́ИН** *м* хаин, хыянатсы (*ҡан ҡойоусы, енәйәтсе*)

**КАЙЛА́** *ж* и **КАЙЛО́** *с* кәйлә

**КАЙМА́** *ж* ҡайма, сит, эргә; **шаль с широ́кой каймо́й** яҫы ҡаймалы (ситле, эргәле) шәл

**КАЙМА́К** *м*; *обл.* ҡаймаҡ

**КАЙМА́Н** *м* кайман (*Үҙәк һәм Көньяҡ Америкала йәшәүсе крокодил төрө*)

**КАЙНОЗО́ЙСКИЙ:** **кайнозо́йская э́ра** кайнозой эраһы (*Ерҙең геологик тарихында иң яңы дәүер*)

**КА́ЙРА** *ж* кайра (*поляр диңгеҙ ҡошо*)

**КАК** *нареч., частица* и *союз* **1.** *нареч.* нисек, ҡайһылай, ҡалай; **как пожива́ете?** нисек йәшәйһегеҙ?; **как ва́ше здоро́вье?** һаулығығыҙ нисек?; **как э́то случи́лось?** нисек булды һуң был?; **как пройти́ к остано́вке?** туҡталышҡа нисек барырға?; **я сде́лал, как вы сказа́ли** һеҙ нисек әйттегеҙ, мин шулай эшләнем; **не зна́ю, как э́то де́лается** мин быны ҡалай эшләнгәнен белмәйем **2.** *нареч.* ҡайһылай, бик, шул тиклем; **как хорошо́!** ҡайһылай яҡшы!; **как я рад тебя́ ви́деть!** һине күреүемә шул тиклем шатмын! **3.** *частица* нисек, бәй, һуң; **как! Ты опя́ть здесь?** нисек! Һин тағы бындамы ни?; **как! Ты уже́ пришёл?** бәй! Һин килдең дәме? **4.** *частица*; *разг.* -мы/-ме; **она́ как закричи́т** ул ҡысҡырып ебәрмәһенме; **как польёт дождь** ямғыр яуып ебәрмәһенме **5.** *союз* кеүек, шикелле, һымаҡ, -дай/-дәй; **твёрдый, как ка́мень** таш һымаҡ (таштай) ҡаты; **бе́лый, как снег** ҡар һымаҡ (ҡарҙай) ап-аҡ **6.** *союз* итеп, күреп, булыу ягынан; **сове́тую э́то вам как друг** мин һеҙгә дуҫ итеп кәңәш бирәм **7.** *союз* -ғанда/-гәндә, менән; **как вспо́мнишь, прия́тно стано́вится** иҫкә төшөргәндә рәхәт булып китә; **как дое́дешь, вы́шли телегра́мму** барып етеү менән телеграмма һуҡ; **как стемне́ет, он вернётся** ҡараңғы төшөү менән ул ҡайтасаҡ ♦ **как бы не** булып ҡуймаһа ғына ярар ине, булып ҡуймаһын; **как бы не так** шулай булмай ҙа ни; **как бы то ни́ было** нисек

кенә булмаһын, һәр хәлдә; **как же** эйе шул, әлбиттә; **как когда́**; **когда́ как** ҡасан нисек, төрлө ваҡытта төрлөсә; **как кому́**; **кому́ как** кемгә нисек, кешеһенә ҡарап; **как мо́жно** мөмкин тиклем; **как нельзя́ лу́чше** үтә һәйбәт, шунан да яҡшыһы юҡ; **как ни в чём не быва́ло** бер ни ҙә булмаған дай; **как пить дать** һис шикһеҙ; **как попа́ло** теләһә нисек, теләһә ҡалай; **как раз**: 1) нәҡ, тап; **он свиде́тель как раз э́того явле́ния** ул нәҡ шул күренештең шаһиты; 2) *в знач. сказ.* тап-таман; **э́та о́бувь мне как раз** был аяҡ кейеме миңә тап-таман; **как сказа́ть** уныһы икеле әле; **как то́лько** -ғас та/-гәс тә, уҡ/үк; **как то́лько он придёт, я вам сообщу́** ул килгәс тә, мин һеҙгә хәбәр итермен

**КАКАДУ́** *м нескл.* какаду (*тутыйғош төрө*)

**КАКА́О** *с нескл.* какао (*ағасы һәм емешенән булған әсемлек*); **ча́шка кака́о** бер сынаяҡ какао

**КА́К-ЛИБО** *нареч. см.* **ка́к-нибудь** 1

**КА́К-НИБУДЬ** *нареч.* **1.** нисек булһа ла, нисек тә; **на́до ка́к-нибудь помо́чь ему́** нисек булһа ла уға ярҙам итергә кәрәк **2.** *разг.* нисек етте шулай, өҫтән-мөҫтән генә; **э́ту рабо́ту нельзя́ де́лать на́скоро и ка́к-нибудь** был эште еңел һәм өҫтән-мөҫтән генә эшләргә ярамай **3.** *разг.* ҡасан да булһа, бер ваҡыт; **я ка́к-нибудь зайду́ к нему́** ҡасан да булһа мин уға кереп сығырмын

**КАК-НИКА́К** *нареч.*; *разг.* нисек кенә булмаһын; **как-ника́к я вам друг** нисек кенә булмаһын, мин һеҙҙең дуҫығыҙ

**КАКО́В,** -а, -о *мест.* **1.** (*обозначает вопрос о качестве, свойстве кого-чего-л.*) нисек, ниндәй; **како́в он собо́й?** төҫкә-башҡа нисек? **2.** (*в качестве союзного слова присоединяет придаточные определительные и дополнительные*) ниндәй, ҡайһылай; **уже́ сейча́с ви́дно, какова́ ситуа́ция** хәлдең ниндәй икәнлеге хәҙер үк күренеп тора **3.** (*в восклицательных и вопросительных предложениях выражает эмоциональную оценку явления, действия, субъекта*) ниндәйерәк, нисегерәк, ниндәй һуң; **а де́нь-то како́в!** көнө һуң ниндәй!

**КАКОВО́** *нареч.* нисек; **каково́ ему́ живётся?** нисек йәшәй икән ул?; **узна́ет, каково́ самово́льничать** белер нисек башбаштаҡланырға

**КАКО́Й,** -ая, -ое *мест.* **1.** (*обозначает вопрос о качестве, свойстве кого-чего-л.*) ниндәй, нисек, ҡалай; **кака́я сего́дня пого́да?** бөгөн һауа торошо нисек?; **како́го мне́ния вы о нём?** уның тураһында һеҙ ниндәй фекерҙәһегеҙ? **2.** (*для выражения вопроса о порядке выбора, следования, о времени появления*) нисәнсе, ҡайһы; **в како́м году́ он роди́лся?** ул нисәнсе йылда тыуған?; **в како́м го́роде ты живёшь?** һин ҡайһы ҡалала (тораһың) йәшәйһең? **3.** (*в восклицательных предложениях для выражения эмоциональной оценки явления, действия, субъекта*) ниндәй; **кака́я ра́дость** ниндәй шатлыҡ ♦ **како́е там** ҡайҙа ул; **како́е там, и слы́шать не хо́чет** ҡайҙа ул, тыңлағы(һы) ла килмәй; **како́й бы то ни́ был** ниндәй генә булмаһын; **како́й ни (на) есть** ниндәй генә булһа ла; **вы́пишите меня́ в каку́ю ни на е́сть брига́ду** мине ниндәй ҙә булһа бер бригадаға яҙығыҙ; **кака́я ра́зница** барыбер түгелме ни; **каки́ми судьба́ми?** ниндәй елдәр ташланы?; **како́й попа́ло** ниндәй эләкһә, ниндәй тура килһә; **како́й из себя́** ниндәй һуң ул, ниндәйерәк; **хоть како́й** ниндәй булһа ла; **ни под каки́м ви́дом** һис тә, бер нисек тә

**КАКО́Й-ЛИБО,** -ая-либо, -ое-либо *мест. см.* **како́й-нибудь** 1

**КАКО́Й-НИБУДЬ,** -ая-нибудь, -ое-нибудь *мест.* **1.** (*тот или иной*) ниндәй ҙә булһа берәй; **зада́ть како́й-нибудь вопро́с** ниндәй ҙә булһа бер һорау биреү; **принеси́ мне каку́ю-нибудь газе́ту** миңә берәй гәзит килтерегеҙ әле **2.** *разг.* (*приближающий к какому-л. количеству*) самаһы, ни бары, тирәһе; **каки́х-нибудь два—три дня** ни бары ике—өс көн; **до го́рода оста́лся како́й-нибудь киломе́тр пути́** ҡалаға тиклем километр самаһы юл ҡалды

**КАКО́Й-ТО,** -ая-то, -ое-то *мест.* **1.** (*неизвестно какой*) бер, ниндәйҙер; **к вам приходи́л како́й-то челове́к** һеҙгә бер кеше килгән ине; **кака́я-то неосо́знанная мысль** ниндәйҙер аңлап етелмәгән (аңлашылмаған) фекер **2.** (*похожий на кого-что-л.*) әллә ниндәй, әллә ниндәй бер; **он како́й-то чуда́к** ул әллә ниндәй ҡыҙыҡ кеше

**КАКОФО́НИЯ** *ж* какофония, аһәңһеҙлек, **какофо́ния зву́ков** ҡолаҡ ярғыс йәмһеҙ тауыштар, тауыштар аһәңһеҙлеге

**КА́К-ТО** *нареч.* **1.** (*каким-то образом*) нисектер, әллә нисек; **э́то вы́шло ка́к-то само́ собо́й** был әллә нисек үҙенән-үҙе килеп сыҡты; **он ка́к-то суме́л ула́дить де́ло** ул эште нисектер яйға һала алды **2.** (*неясно как*) нисек, ҡайһылай; **посмо́трим, ка́к-то они́ нас встре́тят** күрербеҙ, улар беҙҙе нисек итеп ҡаршы алырҙар икән **3.** (*однажды, когда-то*) ҡасандыр, бер саҡ; **ка́к-то я его́ ви́дел на у́лице** мин ҡасандыр уны урамда күргәйнем; **я ка́к-то раз был у него́** мин ҡасандыр унда булғайным **4.** *в знач. частицы* **как-то́**; *разг.* йәғни; **ра́зные фру́кты, как-то́: гру́ши, я́блоки, виногра́д** төрлө емеш-еләк, йәғни: армыт, алма, йөҙөм

**КА́КТУС** *м* кактус

**КА́КТУСОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** кактус ...ы; **ка́ктусовые за́росли** кактус ҡыуаҡлыҡтары **2.** *в знач. сущ.* **ка́ктусовые** *мн.*; *бот.* кактус һымаҡтар

**КАЛ** *м* тиҙәк

**КАЛАМБУ́Р** *м* каламбур (*әйтелеше яғынан оҡшаш булған төрлө мәғәнәле һүҙҙәрҙе шаярып бутап ҡулланыуға ҡоролған әйтем, һүҙ*)

**КАЛАМБУРИ́СТ** *м* каламбурсы, һүҙ уйнатыусы

**КАЛАМБУ́РИТЬ** *несов.* каламбур һөйләү, һүҙ уйнатыу

**КАЛАМБУ́РНЫЙ,** -ая, -ое каламбурлы; **каламбу́рное выраже́ние** каламбурлы әйтем

**КАЛАМЯ́НКА** *ж* беше етен туҡыма

**КАЛАМЯ́НКОВЫЙ,** -ая, -ое беше етен туҡыманан; **каламя́нковые брю́ки** беше етен туҡыманан салбар

**КАЛА́Н** *м* ҡамсат

**КАЛАНЧА́** *ж* **1.** ҡаланса; **пожа́рная каланча́** янғын ҡалансаһы **2.** *разг.*, *шутл.* һонтор, ҡолға

**КАЛА́Ч** *м* ҡалас ♦ **калачо́м не зама́нишь** *кого бер ни менән дә* ҡыҙыҡтыра алмаҫһың; **тёртый кала́ч** шымарған (йышылған) кеше

**КАЛА́ЧИКОМ** *нареч.* бөкләп, бөгәрләнеп; **сиде́ть, поджа́в но́ги кала́чиком** аяҡты бөкләп ултырыу; **соба́ка сверну́лась кала́чиком** эт бөгәрләнеп ятты

**КАЛЕЙДОСКО́П** *м* **1.** калейдоскоп (*әйләндергән һайын төрлө төҫтәге матур фигуралар, биҙәктәр күрһәтә торған оптик прибор*) **2.** *перен.* тиҙ алмашыныу; **калейдоско́п собы́тий** ваҡиғаларҙың тиҙ алмашыныуы

**КАЛЕ́КА** *м* и *ж* ғәрип, зәғиф (*кеше*)

**КАЛЕНДА́РНЫЙ,** -ая, -ое календарь ...ы; **календа́рный план** календарь план; **календа́рный листо́к** календарь бите

**КАЛЕНДА́РЬ** *м* календарь; **отрывно́й календа́рь** йыртма (өҙмә) календарь; **насто́льный календа́рь** өҫтәл календары; **со́лнечный календа́рь** ҡояш календары; **лу́нный календа́рь** ай календары; **календа́рь спорти́вных состяза́ний** спорт ярыштары календары

**КАЛЕ́НДУЛА** *ж* календула, пәйғәмбәр тырнағы

**КАЛЕ́НИЕ** *с см.* **кали́ть** ♦ **довести́ до бе́лого кале́ния** *кого* ныҡ асыуын килтереү, ярһытыу

**КАЛЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙҙырылған, ҡыҙған; **калёное желе́зо** ҡыҙҙырылған тимер **2.** ҡурылған, ҡыҙҙырылған; **калёные оре́хи** ҡурылған сәтләүек **3.** *тех.* һуғарылған; **калёный клино́к** һуғарылған ҡылыс ♦ **калёным желе́зом жечь** *что* төбө-тамыры менән юҡ итеү (юҡҡа сығарыу)

**КАЛЕ́ЧИТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *кого* (*делать калекой*) имгәтеү, ғәрип итеү, зәғифләү **2.** *что*; *перен.* (*портить*) боҙоу; **кале́чить хара́ктер** холоҡ боҙоу

**КАЛЕ́ЧИТЬСЯ** *несов.* **1.** имгәнеү, ғәрипләнеү **2.** *страд. от* **кале́чить**

**КАЛИ́БР** *м* калибр (**1.** *атыу ҡоралы көбәгенең эске диаметры* **2.** *тех. эшләп сығарылған нәмәләрҙең күләмен билдәләү өсөн алынған үлсәм*); **изме́рить разме́ры кали́бром** күләмен калибр менән үлсәү; **балала́йки ра́зного кали́бра** төрлө ҙурлыктағы балалайкалар

**КАЛИБРОВА́ТЬ** *несов. что*; *тех.* калибрлау; **калиброва́ть патро́н** патронды калибрлау; **калиброва́ть семена́** орлоктарҙы калибрлау; **калиброва́ть вольтме́тр** вольтметрҙы калибрлау

**КАЛИБРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* калибрлау ...ы; **калибро́вочный стано́к** калибрлау станогы

**КА́ЛИЕВЫЙ,** -ая, -ое *хим.* **1.** калий ...ы; **ка́лиевые месторожде́ния** калий ятҡылыҡтары **2.** калийлы; **ка́лиевые удобре́ния** калийлы ашламалар

**КА́ЛИЙ** *м* калий (*химик элемент, металл*)

**КАЛИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *хим.* **1.** калий ...ы; **кали́йная промы́шленность** калий сәнәғәте **2.** калийлы; **кали́йные со́ли** калийлы тоҙҙар

**КАЛИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* ҡыҙҙырыу ...ы, иретеү ...ы; **кали́льная печь** ҡыҙҙырыу мейесе

**КАЛИ́НА** *ж* балан (*ҡыуағы һәм емеше*)

**КАЛИ́ННИК** *м* баланлыҡ, балан ҡыуаҡлығы

**КАЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое балан ...ы; **кали́новый пиро́г** балан бәлеше

**КАЛИ́ТКА** *ж* бәләкәй (ел) ҡапҡа

**КАЛИ́ТЬ** *несов. что* **1.** ҡыҙҙырыу; **кали́ть желе́зо** тимер ҡыҙҙырыу **2.** ҡурыу, ҡыҙҙырыу; **кали́ть се́мечки** көнбағыш ҡурыу

**КАЛИ́Ф: кали́ф на час** *ирон.* бер сәғәтлек хәлиф (*ҡыҫҡа ваҡытҡа власть башына менгән кешегә ҡарата*)

**КАЛЛИГРА́Ф** *м* каллиграф, матур яҙыусы

**КАЛЛИГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое каллиграфик, матур; **каллиграфи́ческий по́черк** яҙыуы (почеркы) матур

**КАЛЛИГРА́ФИЯ** *ж* каллиграфия, матур яҙыу оҫталығы

**КАЛМЫ́КИ** *мн.* ҡалмыҡтар, ҡалмыҡ халҡы // *ед.* **калмы́к** *м* ҡалмыҡ ир-аты; **калмы́чка** *ж* ҡалмыҡ ҡатын-ҡыҙы

**КАЛМЫ́ЦКИЙ,** -ая, -ое ҡалмыҡ ...ы; **калмы́цкий язы́к** ҡалмыҡ теле

**КАЛОРИ́ЙНОСТЬ** *ж* калориялылыҡ; **калори́йность угля́** күмерҙең калориялылығы; **калори́йность проду́ктов пита́ния** аҙыҡ-түлектең калориялылығы

**КАЛОРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое калориялы; **калори́йная пи́ща** калориялы аҙыҡ

**КАЛОРИ́МЕТР** *м* калориметр (*йылылыҡ миҡдарын үлсәү ҡорамалы*)

**КАЛОРИМЕ́ТРИЯ** *ж* калориметрия (*физиканың йылылыҡ миҡдарын үлсәү бүлеге*)

**КАЛОРИ́ФЕР** *м* калорифер (*бинаның эсендә һауа йылытыу ҡоролмаһы*)

**КАЛО́РИЯ** *ж* калория (*йылылыҡ үлсәү берәмеге*)

**КАЛО́ШИ** *мн.* (*ед.* **кало́ша** *ж*) калуш ♦ **сесть в кало́шу** уңайһыҙ хәлгә ҡалыу, төп башына ултырыу; **посади́ть в кало́шу** *кого* уңайһыҙ (көлкө) хәлгә ҡалдырыу

**КАЛЫ́М** *м* ҡалым; **плати́ть калы́м** ҡалым түләү

**КАЛЫ́МИТЬ** *несов.*; *прост.* ҡалым һуғыу (эшләү) (*законһыҙ табыш алыу*)

**КАЛЫ́МЩИК** *м*; *прост.* ҡалымсы, ҡалымға йөрөүсе

**КА́ЛЬКА** *ж* калька (**1.** *һыҙма йәки һүрәт төшөрөп алыу өсөн ҡулланылған үтә күренмәле ҡағыҙ йәки туҡыма* **2.** *шундай материалға алынған күсермә* **3.** *лингв. башҡа бер телдән туранан-тура тәржемә итеп алынған һүҙ йәки һүҙбәйләнеш, мәç., “белок” — “аҡһым”, “мороженое” — “туңдырма”*)

**КАЛЬКИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* калькалаштырыу; **кальки́ровать рису́нок** һүрәт калькалаштырыу; **кальки́ровать фразеологи́ческие едини́цы** фразеологик берәмектәрҙе калькалаштырыу (*һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү*)

**КАЛЬКУЛИ́РОВАТЬ** *несов. что*; *спец.* калькуляциялау, калькуляция яһау

**КАЛЬКУЛЯ́ТОР** *м* калькулятор, калькуляция яһаусы (*белгес*)

**КАЛЬКУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *спец.* калькуляция (*тауарҙың үҙкиммәтен һәм һатыу хаҡын иçәпләп сығарыу*)

**КАЛЬМА́Р** *м* кальмар (*диңгеҙ моллюскылары*)

**КАЛЬСО́НЫ** *только мн.* кальсон, ирҙәр ыштаны

**КА́ЛЬЦИЕВЫЙ,** -ая, -ое *хим.* **1.** кальций ...ы **2.** кальцийлы; **ка́льциевые со́ли** кальцийлы тоҙҙар

**КА́ЛЬЦИЙ** *м* кальций (*химик элемент, көмөш кеүек ялтырауыҡлы аҡ металл*)

**КАЛЬЦИНА́ЦИЯ** *ж*; *хим.* кальцинация (*химик матдәләрҙе окислаштырыу йәки тарҡатыу өсөн ҡыҙҙырыу*)

**КАЛЬЦИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* кальцинациялау, яндырыу, ҡыҙҙырыу

**КАЛЬЦИ́Т** *м*; *мин.* кальцит (*эзбизташтың һәм мәрмәрҙең составын тәшкил иткән минерал; эзбиз шпаты*)

**КАЛЬЯ́Н** *м* ҡалъян

**КАМА́РИНСКАЯ** *ж* и **КАМА́РИНСКИЙ** *м* камаринский (*урыç халыҡ бейеүе һәм көйө*)

**КА́МБАЛА** и **КАМБАЛА́** *ж* камбала (*балыҡ*)

**КА́МБИЙ** *м*; *бот.* камбий, сөсөк, күшкә

**КАМБОДЖИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое Камбоджа ...ы; **камбоджи́йский флаг** Камбоджа байрағы

**КАМБОДЖИ́ЙЦЫ** *мн.* Камбоджа халҡы // *ед.* **камбоджи́ец** *м* Камбоджа ир-аты; **камбоджи́йка** *ж* Камбоджа ҡатын-ҡыҙы; *см.* **кхме́ры**

**КА́МБУЗ** *м* камбуз (*карапта аш бүлмәһе*)

**КАТЕГО́РИЯ** *ж*; *в разн. знач.* категория; **катего́рия вре́мени** *филос.* ваҡыт категорияһы; **граммати́ческие катего́рии** грамматик категориялар; **весова́я катего́рия** ауырлыҡ категорияһы; **возрастна́я катего́рия** йәш категорияһы

**КА́ТЕР** *м* катер; **торпе́дный ка́тер** торпеда катеры; **сторожево́й ка́тер** һаҡта тороусы катер

**КА́ТЕРНЫЙ,** -ая, -ое катер ...ы; **ка́терный старшина́** катер старшинаһы

**КА́ТЕТ** *м*; *мат.* катет (*тура мөйөшлө өсмөйөштә тура мөйөш яһаусы яҡтарҙың береһе*)

**КАТЕ́ТЕР** *м*; *мед.* катетер (*һейҙек юлына индерелмәле көпшә*)

**КАТЕХИ́ЗИС** *м* катехизис (*христиан дине тәғлимәтен һорау-яуап рәүешендә ҡыҫҡаса тәфсир итеү*)

**КАТИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* тәгәрләтеү; **кати́ть бревно́** бүрәнәне тәгәрләтеү 2. *без доп.*; *разг.* елдереү, сабыу, елеү; **кати́ть на маши́не** машинала елдереү; **кати́ть босико́м** ялан аяҡ елдереү

**КАТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** тәгәрләү, тәгәрләп барыу, шыуыу, барыу; **со сту́ком кати́лись деревя́нные шары́** ағас шарҙар туҡылдап тәгәрләне; **кати́ться на са́нках с горы́** тауҙан санала шыуыу; **по́езд пла́вно ка́тится по ре́льсам** поезд рельс буйлап шыма ғына бара **2.** *разг.* елеү, елдереү; **по у́лице кати́лись маши́ны** урамда машиналар елә ине **3.** *перен.* (*разноситься, раздаваться*) яңғырау, яңғырап тороу (уҙыу); **э́хо тяжело́ кати́лось вдоль обры́вов** текә ярҙар буйлап шаңдау яңғырап уҙҙы **4.** (*течь, струиться*) ағыу, тәгәрләү, тамыу; **река́ тороплии́во ка́тится вдоль бе́рега** йылға яр буйлап ашҡынып аға; **ка́тятся слёзы** күҙ йәштәре тәгәрләй **5.** үтеү, үтеп тороу; **день ка́тится за днём** көн артынан көн үтеп тора **6.** (*о светилах*) йөҙөү; **луна́ ка́тится по не́бу** күктә ай йөҙә **7.** *повел.* **кати́сь (кати́тесь)** *прост.* шыл, һыпырт (һыпыртығыҙ); **кати́сь отсю́да!** шыл бынан! ♦ **кати́ться по́д гору** эш-хәл хөртәйеү

**КАТО́Д** *м* катод (*кире зарядлы электрод*)

**КАТО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** катод ...ы; **като́дные лучи́** катод нурҙары **2.** катодлы; **като́дная ла́мпа** катодлы лампа

**КАТО́К** *м* һырғалаҡ; **ката́ться на катке́** һырғалаҡтан шыуыу **2.** *тех.* каток; **доро́жный като́к** юл катогы **3.** (*для катанья белья*) бәләк

**КАТО́ЛИК** *м* католик (*католицизмды ҡабул иткән кеше*)

**КАТОЛИЦИ́ЗМ** *м* католицизм (*башында Рим Папаһы торған һәм үҙ иерархияһы булған христиан диненең төп йүнәлештәренең береһе*)

**КАТОЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое католик; **католи́ческая це́рковь** католик сиркәүе

**КАТОЛИ́ЧЕСТВО** *с см.* **католици́зм**

**КА́ТОРГА** *ж* каторга; **отпра́вить на ка́торгу** каторгаға ебәреү; **бежа́ть с ка́торги** каторганан ҡасыу

**КАТОРЖА́НИН** *м* и **КАТОРЖА́НКА** *ж* каторжан

**КА́ТОРЖНИК** *м см.* **каторжа́нин**

**КА́ТОРЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** каторга ...ы; **ка́торжные рабо́ты** каторга эштәре **2.** *перен.* үтә ауыр; **ка́торжный труд** үтә ауыр эш

**КАТУ́ШКА** *м* **1.** кәтүк; **кату́шка ни́ток** бер кәтүк еп **2.** *эл., радио.* катушка; **кату́шка сопротивле́ния** ҡаршылыҡ катушкаһы ♦ **на всю (по́лную) кату́шку** тулыһынса, бөтә көскә, күпме мөмкин

**КАТЮ́ША** *ж* катюша (*автомобилгә урынлаштырылған реактив снарядлы миномёт*)

**КАУЗА́ЛЬНОСТЬ** *ж; филос.* сәбәплелек

**КАУЗА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *филос.* сәбәпле; **кауза́льная связь** сәбәпле бәйләнеш

**КАУ́РКА** *м* и *ж; разг.* ҡола, ҡола ат ♦ **ве́щая (ве́щий) кау́рка** тылсымлы ат (*әкиәттәрҙә*)

**КАУ́РЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о масти лошади*) ҡола; **кау́рый жеребе́ц** ҡола айғыр **2.** *в знач. сущ.* **кау́рый** *м* ҡола

**КА́УСТИК** *м* каустик (*зәһәрле соданың техникалағы атамаһы*)

**КАУСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *хим.* зәһәрле, каустик; **каусти́ческая со́да** зәһәрле сода

**КАУЧУ́К** *м* каучук; **синтети́ческий каучу́к** яһалма каучук; **натура́льный каучу́к** тәбиғи каучук

**КАУЧУ́КОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** каучук ...ы; **каучу́ковый заво́д** каучук заводы **2.** каучук; **каучу́ковая подо́шва** каучук табан

**КАУЧУКОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое каучуклы, каучук бирә торған; **каучуконо́сные расте́ния** каучуклы үҫемлектәр

**КАУЧУКОНО́СЫ** *мн.* (*ед.* **каучуконо́с** *м*) каучуклы үҫемлек

**КАФЕ́** *с нескл.* кафе

**КА́ФЕДРА** *ж* кафедра (**1.** *телмәр тотоусы, һүҙ алыусы, уҡытыусы өсөн яһалған бейек урын* **2.** *юғары уҡыу йортонда билгеле бер тармаҡҡа ҡараған фәндәр уҡытыу бүлеге* **3.** *сиркәүҙә епископ ултырып, вәғәз һөйләгән ҡалҡыу урын* **4.** *епархия менән етәкселек иткән епископ вазифаһы*)

**КАФЕДРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кафедра ...ы; **кафедра́льное заседа́ние** кафедра ултырышы ♦ **кафедра́льный собо́р (це́рковь)** кафедраль собор (сиркәү)

**КА́ФЕЛЬ** *м* кафель (*йоҡа сынаяҡ кирбес*)

**КА́ФЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кафель ...ы; **ка́фельное произво́дство** кафель етештереү **2.** кафель; **ка́фельный пол** кафель иҙән

**КАФЕТЕ́РИЙ** *м* кафетерий (*кафе төрө*)

**КАФТА́Н** *м; ист.* кафтан (*оҙон итәкле борonғо ирҙәр кейеме*)

**КАХЕТИ́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** кахетин ...ы, Кахетия ...ы; **кахети́нский обы́чай** кахетин йолаһы; **Кахети́нский хребе́т** Кахетия тау һырты **2.** *в знач. сущ.* **кахети́нское** *с* (*сорт вина*) Кахетия шарабы (*Грузияла эшләнгән виноград шарабы*)

**КАХЕТИ́НЦЫ** *мн.* кахетиндар (*грузин халҡының этнографик төркөмө*) // *ед.* **кахети́нец** *м* кахетин ир-аты; **кахети́нка** *ж* кахетин ҡатын-ҡыҙы

**КАЦАВЕ́ЙКА** *ж* кацавейка (*урыҫ ҡатын-ҡыҙҙары кейгән мамыҡ йәки тире менән эсләнгән йылы кофта төрө*)

**КАЧА́ЛКА** *ж* **1.** бәүелмәле ултырғыс **2.** бәүелсәк, ҡалҡанбаш **3.** качалка (*ике тәгәрмәсле ат ярышы арбаһы*)

**КАЧА́НИЕ** *с см.* **кача́ть, кача́ться; кача́ние воды́ насо́сом** насос менән һыу һурҙырыу; **кача́ние на каче́лях** сәңгелдәктә бәүелеү

**КАЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* бәүетеү, тирбәтеү, бәүелдереү, һелкетеү, сайҡалдырыу; **кача́ть**

**колыбе́ль** сәңгелдәк (бишек) бәүетеү; **ве́тер кача́ет верху́шки дере́вьев** ел ағас баштарын сайҡалдыра **2.** *чем* һелкетеү, сайҡау; **кача́ть ного́й** аяҡ һелкетеү **3.** *кого* сөйөү; **кача́ть юбиля́ра** юбилярҙы сөйөү **4.** *что* һурыу, сығарыу, һурҙырыу, ағыҙыу; **кача́ть во́ду** һыу сығарыу; **кача́ть мёд** бал ағыҙыу (айыртыу)

**КАЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бәүелеү, сайҡалыу, һелкенеү, тирбәлеү; **ло́дка кача́ется на волна́х** кәмә тулҡын өҫтөндә сайҡала; **ма́ятник кача́ется** маятник бәүелә **2.** тәнтерәкләү, сайҡалыу; **он шёл кача́ясь** ул тәнтерәкләп китеп бара ине

**КАЧЕ́ЛИ** *мн.* бәүелсәк, сәңгелдәк; **кача́ться на каче́лях** бәүелсәктә (сәңгелдәктә) бәүелеү

**КА́ЧЕСТВЕННОСТЬ** *ж*; *разг. см.* **ка́чество** 2

**КА́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** сифат ...ы; **ка́чественные показа́тели** сифат күрһәткестәре; **ка́чественные разли́чия** сифат айырмалары **2.** *разг.* юғары (яҡшы) сифатлы, затлы; **ка́чественные това́ры** затлы тауарҙар; **ка́чественная проду́кция** юғары сифатлы продукция ♦ **ка́чественный ана́лиз** *хим.* сифат яғынан анализ; **ка́чественное прилага́тельное** *грам.* төп сифат

**КА́ЧЕСТВО** *с* **1.** үҙенсәлек, сифат, һыҙат; **ка́чество и коли́чество** сифат һәм һан; **перехо́д к но́вому ка́честву** яңы сифатҡа күсеш **2.** сифат; **ка́чество рабо́ты** эш сифаты; **отли́чное ка́чество** айырым сифат **3.** *филос.* сифат; **перехо́д коли́чества в ка́чество** һандың сифатҡа күсеүе **4.** *шахм.* сифат яғы, сифаты; **потеря́ть ка́чество** сифатын юғалтыу; **вы́играть ка́чество** сифат яғынан отоу ♦ **в ка́честве** *кого-чего* булып, сифатында, рәүешендә; **он рабо́тает в ка́честве те́хника** ул техник булып эшләй

**КА́ЧКА** *ж* сайҡалыу, бәүелеү, тирбәлеү; **морска́я ка́чка** диңгеҙ сайҡалыуы ♦ **бортова́я ка́чка** караптың сайҡалыуы; **килева́я ка́чка** киль тирбәлеше

**КАЧНУ́ТЬ** *сов. см.* **кача́ть**

**КАЧНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **кача́ться**

**КА́ША** *ж*; *прям., перен.* бутҡа, иҙмә; **ри́совая ка́ша** дөгө бутҡаһы; **вари́ть ка́шу** бутҡа бешереү; **бето́нная ка́ша** бетон иҙмәһе ♦ **берёзовая ка́ша** шыйыҡ сыбыҡ; **ка́ша в голове́** *у кого* буталсыҡ; **ка́ша во рту** *у кого* ауыҙынан һүҙ сыҡмай; **завари́ть ка́шу** эш бутау; **завари́лась ка́ша** эш буталыу, буталсыҡ; **расхлёбывать ка́шу** кемдер бутаған эште аҙағына еткереү; **накорми́ть берёзовой ка́шей** шыйыҡ сыбыҡ менән ярыу; **ка́ши не сва́ришь** *с кем* уртаҡ тел табып булмай, бутҡа бешереп булмай, борсағың бешмәү; **ма́ло ка́ши ел** аҙ күргән; **про́сят ка́ши** (*об обуви*) ашарға һорай (*аяҡ кейеменең йыртылып йәки ҡубып тороуы*)

**КАШАЛО́Т** *м* кашалот (*тешле киттарға ҡараған эре диңгеҙ хайуаны*)

**КАШЕВА́Р** *м* ашнаҡсы (*хәрби часта, артелдә*)

**КАШЕВА́РИТЬ** *несов.*; *прост.* аш бешереү, бешереү; **кашева́рить по о́череди** сиратлап бешеренеү

**КА́ШЕЛЬ** *м* йүтәл, йүткерек; **сухо́й ка́шель** ҡоро йүтәл

**КАШЕМИ́Р** *м* кешмир (*йоҡа йөн туҡыма*)

**КАШЕМИ́РОВЫЙ,** -ая, -ое кешмир; **кашеми́ровый плато́к** кешмир яулыҡ

**КА́ШИЦА** и **КАШИ́ЦА** *ж*; *разг.* шыйыҡ бутҡа; **корми́ть жи́дкой ка́шицей** шыйыҡ бутҡа ашатыу; **грязева́я каши́ца** иҙелеп ятҡан батҡаҡ (бысраҡ)

**КА́ШЛЯНУТЬ** *сов. см.* **ка́шлять**

**КА́ШЛЯТЬ** *несов.* йүтәлләү, йүткереү; **ка́шлять с кро́вью** ҡан төкөрөп йүтәлләү

**КАШНЕ́** *с нескл.* кашне (*муйын яулығы*)

**КАШПО́** *с нескл.* кашпо (*декоратив ваза*)

**КАШТА́Н** *м* каштан (*ағасы һәм емеше*)

**КАШТА́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** каштан ...ы; **кашта́новое де́рево** каштан ағасы **2.** (*о цвете*) ҡуңыр (ҡыҙғылт ҡара), каштан төҫлө; **кашта́новые во́лосы** ҡуңыр сәс

**КАЮ́Р** *м* каюр (*эт, болан егелгән нарта кҫсере*)

**КАЮ́ТА** *ж* каюта, бүлмә (*пароходта*)

**КАЮ́Т-КОМПА́НИЯ** *ж* кают-компания (*пароходта пассажирҙарға, хәрби карапта командирҙарға ашау-эсеү, ял итеү өсөн дөйөм бүлмә*)

**КА́ЯТЬСЯ** *несов.* **1.** (*испытывать сожаление*) үкенеү, үкенеп бөтә алмау **2.** *кому, перед кем* үҙ ғәйебен таныу, тәүбә итеү **3.** *в знач. вводн. сл.* **ка́юсь**; *разг.* ғәйепләмен, үкенәм; **ка́юсь, я ма́ло об э́том ду́мал** үкенәм, был турала мин аҙ уйлағанмын **4.** *церк.* тәүбә итеү, тәүбәгә килеү, ярлыҡау һорау; **ка́яться в греха́х** гөнаһтарҙан тәүбәгә килеү

**КВАДРА́Т** *м* **1.** квадрат, дүрткел **2.** *мат.* квадрат; **четы́ре — квадра́т двух** дүрт — икенең квадраты; **возвести́ в квадра́т** квадратҡа күтәреү

**КВАДРА́ТНО-ГНЕЗДОВО́Й,** -ая, -ое квадрат оя; **квадра́тно-гнездова́я поса́дка** квадрат оя менән сәсеү; **квадра́тно-гнездова́я се́ялка** квадрат оя сәскес

**КВАДРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** квадрат, дүрткел; **квадра́тный стол** дүрткел өҫтәл; **квадра́тный подборо́док** дүрткел эйәк **2.** *мат.* квадрат ...ы; **квадра́тный ко́рень** квадрат тамыры ♦ **квадра́тные ско́бки** квадрат йәйәләр

**КВАДРАТУ́РА** *ж*; *мат.* квадратура (**1.** *билдәле бер майҙандағы квадрат берәмектәр һаны* **2.** *билдәле фигураға майҙаны буйынса тиң квадрат һыҙыу* **3.** *майҙан ҙурлығын йәки интеграл иҫәпләү*) ♦ **квадрату́ра кру́га** сисеп булмаған мәсьәлә

**КВАДРИЛЛИО́Н** *м* квадриллион (*15 нулле* (*ҡайһы бер илдәрҙә 24*) *берәмек, һан*)

**КВАЗА́Р** *м*; *астр.* квазар (*көслө радио һәм оптик нурҙар таратыусы йыһандағы алыҫ объект*)

**КВАЗИ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ялған", "ысын түгел" мәғәнәһендәге беренсе киҫәге, мәҫ.*, **квазинау́чный** ялған ғилми; **квазиреволюцио́нный** ялған революцион

**КВА́КАНЬЕ** *с* баҡылдау; **ква́канье лягу́шек** баҡалар баҡылдауы

**КВА́КАТЬ** *несов.* баҡылдау, баҡ-баҡ итеү

**КВА́КУШКА** *ж*; *разг.* баҡа

**КВА́КША** *ж* ағас тәлмәрйене

**КВАЛИФИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое квалификация ...ы; **квалификацио́нная коми́ссия** квалификация комиссияһы

**КВАЛИФИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **квалифици́ровать 2.** квалификация, нарыҡ, баһа; **высо́кая квалифика́ция** юғары квалификация **3.** (*специальность*) квалификация, һөнәр; **приобрести́ квалифика́цию то́каря** токарь һөнәрен өйрәнеү

**КВАЛИФИЦИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **квалифици́ровать 2.** *прил.* (юғары) квалификациялы; **квалифици́рованный рабо́тник** квалификациялы эшсе **3.** квалификация (махсус белем) талап иткән; **квалифици́рованный труд** махсус белем талап иткән эш

**КВАЛИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** баһа (нарыҡ) биреү, нарыҡлау; **квалифици́ровать преступле́ние** енәйәткә баһа биреү **2.** (*определить степень специальной подготовки*) белем кимәлен (квалификацияһын) билдәләү

**КВАЛИФИЦИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* һөнәр (квалификация) алыу (камиллаштырылыу) **2.** *несов. страд. от* **квалифици́ровать**

**КВАНТ** *м*; *физ.* квант (*энергияның иң кескәй өлөшсәһе*)

**КВА́НТОВЫЙ,** -ая, -ое квант ...ы; **ква́нтовая тео́рия све́та** яҡтылыҡтың квант теорияһы ♦ **ква́нтовая меха́ника** квант механикаһы

**КВА́РТА** *ж* кварта (**1.** *ҡайһы бер илдәрҙә шыйыҡ йәки бөртөклө нәмәне үлсәү берәмеге* **2.** *муз. диатоник гаммала бирелгән баҫҡыстан дүртенсе баҫҡысҡа тиклем ара*)

**КВАРТА́Л** *м* квартал (**1.** *йылдың дүрттән бер өлөшө* **2.** *ҡаланың дүрт яҡтан киҫешкән урамдар менән сикләнгән өлөшө*)

**КВАРТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое квартал ...ы; **кварта́льный план** квартал планы; **кварта́льный уча́сток** квартал участкаһы

**КВАРТЕ́Т** *м* квартет (**1.** *дүрт ҡорал йәки дүрт тауыш өсөн яҙылған музыка әҫәре* **2.** *муз. дүрт музыканттан йәки дүрт йырсынан торған ансамбль*)

**КВАРТИ́РА** *ж* фатир, квартира; **трёхко́мнатная кварти́ра** өс бүлмәле фатир; **жить на кварти́ре** фатирҙа тороу

**КВАРТИРА́НТ** *м* и **КВАРТИРА́НТКА** *ж* фатирсы, фатирҙа (квартирала) тороусы

**КВАРТИРМЕ́ЙСТЕР** *м* квартирмейстер (*ҡайһы бер илдәрҙә, шулай уҡ революцияға тиклем Рәсәйҙә ғәскәрҙәге фатирҙарға урынлаштырыу, аҙыҡ-түлек таратыу эшен башҡарыусы*)

**КВАРТИ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фатир ...ы, квартира ...ы; **кварти́рная пла́та** фатир хаҡы; **кварти́рная хозя́йка** фатир хужабикәһе **2.** *в знач. сущ.* **кварти́рные** *мн.* фатир аҡсаһы (*командировкала*)

**КВАРТИРОВА́ТЬ** *несов.* **1.** фатирҙа (квартирала) тороу **2.** (*о войсках*) берәй урында тороу, урынлашыу

**КВАРТИРОНАНИМА́ТЕЛЬ** *м*; *офиц.-дел.* фатирға инеүсе, квартир алыусы

**КВАРТИРОСЪЁМЩИК** *м*; *офиц.-дел.* фатир (квартира) алыусы

**КВАРТИРЬЕ́Р** *м*; *воен.* квартирьер (*ғәскәри частарға алдан фатир әҙерләп тороусы кеше*)

**КВАРТПЛА́ТА** *ж* фатир (квартира) хаҡы

**КВАРЦ** *м* **1.** (*минерал*) кварц **2.** *разг.* кварц ...ы; **лечи́ть ква́рцем** кварц лампаһы менән дауалау

**КВА́РЦЕВЫЙ,** -ая, -ое кварцлы; **ква́рцевые поро́ды** кварцлы тоҡомдар; **ква́рцевый песо́к** кварцлы ҡом ♦ **ква́рцевая ла́мпа** кварц лампаһы

**КВАРЦИ́Т** *м* кварцит (*кварцлы тау тоҡомо*)

**КВАС** *м* кеүәҫ; **хле́бный квас** икмәк кеүәҫе

**КВА́СИТЬ** *несов. что* әсетеү, ойотоу, тоҙлау; **ква́сить молоко́** һөт ойотоу; **ква́сить капу́сту** кәбеҫтә тоҙлау

**КВА́СИТЬСЯ** *несов.* **1.** әсеү, ойоу **2.** *страд. от* **ква́сить**

**КВАСНО́Й,** -ая, -ое кеүәҫ ...ы; **квасно́й за́пах** кеүәҫ еҫе

**КВАСЦЕВА́ТЬ** *несов. что*; *спец.* әсетеп эшкәртеү; **квасцева́ть ко́жу** күнде әсетеп эшкәртеү

**КВАСЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое әсеүташ ...ы; **квасцо́вый раство́р** әсеүташ иретмәһе

**КВАСЦЫ́** *только мн.* әсеүташ

**КВА́ШЕНИЕ** *с см.* **ква́сить**

**КВА́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **ква́сить**

**КВА́ШЕНЫЙ,** -ая, -ое әсеткән, ойотҡан, тоҙло; **ква́шеное молоко́** ойотҡан һөт; **ква́шеное те́сто** әсеткән ҡамыр; **ква́шеная капу́ста** тоҙло кәбеҫтә

**КВАШНЯ́** *ж* **1.** икмәк күнәге; **замеси́ть те́сто в квашне́** икмәк күнәгендә ҡамыр баҫыу **2.** *разг.* (*тесто*) әсе ҡамыр **3.** *прост.* ебегән кеше

**КВЕ́РХУ** *нареч.* юғарыға, өҫкә; **подпры́гнуть кве́рху** юғарыға һикереү; **подня́ть глаза́ кве́рху** күтәрелеп ҡарау

**КВИ́НТА** *ж*; *муз.* квинта (**1.** *диатоник гаммала бирелгән баҫҡыстан бишенсе баҫҡысҡа тиклемге ара* **2.** *скрипкала һәм башҡа ҡыллы музыка ҡоралында иң юғары тонлы ҡыл*) ♦ **ве́шать нос на кви́нту** кәйеф төшөү

**КВИНТЕ́Т** *м* квинтет (**1.** *биш ҡоралға йәки биш тауышҡа яҙылған музыка әҫәре* **2.** *муз. биш музыканттан йәки биш йырсынан торған ансамбль*)

**КВИНТЭССЕ́НЦИЯ** *ж*; *книжн.* квинтэссенция, асыл, нигеҙ, төп

**КВИТ** и **КВИ́ТЫ** *в знач. сказ.*; *разг.* иҫәп-хисап бөттө; **мы с ним тепе́рь кви́ты** уның менән беҙҙең арала иҫәп-хисап бөттө

**КВИТАНЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое квитанция ...ы; **квитанцио́нная кни́жка** квитанция кенәгәһе

**КВИТА́НЦИЯ** *ж* квитанция

**КВО́РУМ** *м* кворум (*йыйылыштың тулы хоҡуҡлы булыуы өсөн етерлек ҡатнашыусылар һаны*)

**КВО́ТА** *ж* квота, өлөш, норма; **и́мпортная кво́та** импорт квотаһы; **нало́говая кво́та** һалым өлөшө

**КВО́ХТАНЬЕ** *с см.* **клохта́нье**

**КВОХТА́ТЬ** *несов. см.* **клохта́ть**

**КЕБ** *м* кеб (*Англияла бер ат егелгән экипаж*)

**КЕГЕЛЬБА́Н** *м* кегельбан (*кегли уйнау өсөн махсус урын йәки өй*)

**КЕ́ГЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кегли ...ы; **ке́гельный шар** кегли шары

**КЕ́ГЛИ** *мн.* (*ед.* **ке́гля** *ж*) кегли (*теҙеп ултыртылған ҡыҫҡа таяҡтарҙы шар менән һуғып уйнай торған уйын һәм уның таяҡтары*); **расставля́ть ке́гли** кеглиҙарҙы теҙеп ҡуйыу

**КЕГЛЬ** и **КЕ́ГЕЛЬ** *м*; *полигр.* кегль (*типография хәрефтәренең ҙурлыҡ үлсәме*)

**КЕДР** *м* кедр, эрбет ♦ **гимала́йский кедр** гималай эрбете; **сиби́рский кедр** себер эрбете

**КЕДРО́ВКА** *ж* баянғош (*турғайҙар төркөмөнә ҡараған ҡош*)

**КЕДРО́ВНИК** *м* эрбет (кедр) урманы

**КЕДРО́ВЫЙ** и *уст.* **КЕ́ДРОВЫЙ,** -ая, -ое эрбет (кедр) ...ы; **кедро́вые оре́хи** эрбет сәтләүеге

**КЕ́ДЫ** *мн.* кеды (*спорт аяҡ кейеме*)

**КЕЙФ** *м*; *разг.* кәйеф-сафа

**КЕЙФОВА́ТЬ** *несов.*; *разг.* кәйеф-сафа ҡороу

**КЕКС** *м* кекс (*йөҙөм, сәтләүек һ.б. ҡушып, майға баҫып бешерелгән икмәк*)

**КЕЛЕ́ЙНОСТЬ** *ж* аҫтыртынлыҡ, йәшеренлек, тар даирәлелек; **келе́йность обсужде́ния** фекер алышыуҙағы сикләнгәнлек, тар даирәлелек

**КЕЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **ке́лья** **2.** *перен.* аҫтыртын, тар даирәлә, тар даирә менән; **келе́йное реше́ние дел** эштәрҙе аҫтыртын хәл итеү

**КЕ́ЛЬНЕР** *м* кельнер (*ҡайһы бер Көнбайыш илдәрҙә ресторан хеҙмәтсеһе*)

**КЕ́ЛЬТЫ** *мн.* (*ед.* **кельт** *м*) кельттар (*Көнбайыш Европала йәшәгән боронғо ҡәбиләләр*)

**КЕ́ЛЬЯ** *ж* хөжрә, монах бүлмәһе

**КЕ́МПИНГ** *м* кемпинг (*автотуристар лагеры*)

**КЕНА́Ф** *м* кенәп (*сүсле үҫемлек*)

**КЕНГУРУ́** *м нескл.* көнгөрә

**КЕ́ПКА** *ж* кепка (*баш кейеме*)

**КЕРАМЗИ́Т** *м* керамзит (*төҙөлөш материалы*); **изготовля́ть керамзи́т** керамзит эшләү

**КЕРАМЗИТОБЕТО́Н** *м* керамзитбетон (*керамзит ҡушылған еңел бетон*)

**КЕРА́МИКА** *ж* керамика (**1.** *балсыҡтан һауыт-һаба эшләү шөғөлө* **2.** *балсыҡтан яһалған әйберҙәр* **3.** *шундай әйберҙәр яһау өсөн ҡулланылған балсыҡ*); **худо́жественная кера́мика** художестволы керамика

**КЕРАМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** керамика ...ы; **керами́ческий цех** керамика цехы **2.** керамик; **керами́ческие пли́тки** керамик плиткалар

**КЕРОГА́З** *м* керогаз (*примус төрө*)

**КЕРОСИ́Н** *м* кәрәсин; **заправля́ть кероси́ном** кәрәсин һалыу

**КЕРОСИ́НКА** *ж* керосинка (*филтәле йылытыу приборы*)

**КЕРОСИ́ННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* кәрәсин ...ы; **кероси́нный за́пах** кәрәсин еҫе

**КЕРОСИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое кәрәсин ...ы; **кероси́новый за́пах** кәрәсин еҫе; **кероси́новая ла́мпа** кәрәсин лампаһы

**КЕ́САРЕВ: ке́сарево сече́ние** *мед.* кесарев киҫеше (*ҡарындағы баланы операция юлы менән алыу*)

**КЕССО́Н** *м*; *тех.* кессон (*һыу аҫтында эшләү өсөн һыу үтмәй торған камера*)

**КЕССО́ННЫЙ,** -ая, -ое кессон ...ы; **кессо́нные сте́ны** кессон диуарҙары; **кессо́нные рабо́ты** һыу аҫты эштәре, кессон менән эшләнә торған эштәр ♦ **кессо́нная боле́знь** *мед.* кессон ауырыуы (*ҡапыл юғары атмосфера баҫымынан түбәнге атмосфера баҫымына күскәндә барлыҡҡа килгән ауырыу*)

**КЕ́ТА** и **КЕТА́** *ж* кета (*диңгеҙ балығы*)

**КЕТГУ́Т** *м* кетгут (*ваҡ мал эсәгенән яһалған еп: операция ваҡытында киҫелгән урындарҙы тегеү өсөн ҡулланыла*)

**КЕТМЕ́НЬ** *м* кәтмән (*эш ҡоралы*); **оку́чивать карто́шку кетменём** картуфты кәтмән менән күмеү

**КЕ́ТОВЫЙ** и *разг.* **КЕТО́ВЫЙ,** -ая, -ое кета ...ы; **кето́вая икра́** кета ыуылдырығы

**КЕФА́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое и **КЕФА́ЛИЙ,** -ья, -ье кефаль ...ы; **кефа́левая икра́** кефаль ыуылдырығы

**КЕФА́ЛЬ** *ж* кефаль (*диңгеҙ балығы*)

**КЕФИ́Р** *м* кефир; **фрукто́вый кефи́р** емеш һуты һалынған кефир

**КЕФИ́РНЫЙ,** -ая, -ое кефир ...ы; **кефи́рные грибки́** кефир үңәҙе

**КИБЕРНЕТИЗА́ЦИЯ** *ж* кибернетикалаштырыу; **кибернетиза́ция нау́ки** фәнде кибернетикалаштырыу

**КИБЕРНЕТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* кибернетикалаштырыу

**КИБЕРНЕ́ТИК** *м* кибернетик

**КИБЕРНЕ́ТИКА** *ж* кибернетика

**КИБЕРНЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое кибернетик; **кибернети́ческие автома́ты** кибернетик автоматтар

**КИБИ́ТКА** *ж* **1.** көймәле арба **2.** (*жилище*) тирмә **3.** өй; **сама́нная киби́тка** саман өй

**КИВА́НИЕ** *с см.* **кива́ть**

**КИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *чем* һелкеү, сайҡау, ҡағыу; **кива́ть голово́й** баш ҡағыу **2.** *на кого-что* ымлау, баш (эйәк) ҡағыу; **кива́ть на сосе́да** күршегә ымлау

**КИВНУ́ТЬ** *сов. см.* **кива́ть**

**КИВО́К** *м* баш ҡағыу (эйеү)

**КИДА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, чем* ырғытыу, бәреү, ташлау; **кида́ть ка́мни** таш ырғытыу; **кида́ть спи́чки на́ пол** иҙәнгә шырпы ташлау; **кида́ть не́вод** ау ташлау; **кида́ть ре́плики** ҡаршы һүҙ ташлау **2.** *кого-что* индереү, ташлау; **кида́ть войска́ в бой** ғәскәр индереү; **кида́ть взгляд** ҡараш ташлау **3.** *обычно безл.* сайҡалдырыу, ырғытыу; **ло́дку кида́ло из стороны́ в сто́рону** кәмәне ян-яҡҡа сайҡалдырҙы ♦ **кида́ть в жар** яндырыу (*ауырыуға ҡарата*); **кида́ть в дрожь** ҡалтыратыу (*ҡурҡыуҙан, өшөүҙән*); **кида́ть в пот** тирләтеү (*ауырыуға ҡарата*); **кида́ть жре́бий** йәрәбә һалыу; **кида́ть тень** *на кого-что* шик һалыу, ҡара яғыу; **кида́ть гря́зью** *в кого* хурлау, ҡара яғыу; **кида́ть де́ньги на ве́тер** аҡсаны елгә осороу; **кида́ть ка́мешек в огоро́д** *чей* һүҙ ебәреү (ташлау), *кемдеңдер* баҡсаһына таш ташлау

**КИДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *чем* бәрешеү, ташлашыу, ырғытышыу, атышыу; **кида́ться снежка́ми** ҡар бәрешеү **2.** *кем-чем*; *перен.*, *разг.* (*пренебрегать*) иҫәпләшмәү, һаҡламау; **кида́ться деньга́ми** аҡсаны һаҡлап тотмау (туҙҙырыу) **3.** ташланыу, ауыу, ынтылыу; **кида́ться в во́ду** һыуға ташланыу; **кида́ться в посте́ль** түшәккә ауыу; **соба́ка кида́ется на прохо́жих** эт үтеп барыусыларға ташлана; **кида́ться к вы́ходу** сығырға ынтылыу; **кида́ться на ше́ю** муйынға ташланыу; **кида́ться на по́мощь** ярҙамға ташланыу; **кида́ться из стороны́ в сто́рону** бер яҡтан икенсе яҡҡа ташланыу (йүгереклəү) **4.** *страд. от* **кида́ть** ♦ **кида́ться в глаза́** күҙгә ташланыу

**КИЗИ́Л** и **КИЗИ́ЛЬ** *м* мүшмел (*ағасы һәм емеше*)

**КИЗИ́ЛОВЫЙ** и **КИЗИ́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое мүшмел ...ы; **кизи́ловая ро́ща** мүшмел урманы; **кизи́левое варе́нье** мүшмел ҡайнатмаһы

**КИЗИ́ЛЬНИК** *м* мүшмел ҡыуаҡлығы

**КИЗЯ́К** *м* тиҙәк (*яғыулыҡ*)

**КИЙ** *м* кий (*бильярд таяғы*)

**КИКИ́МОРА** *ж* бисура

**КИЛЕВО́Й,** -ая, -ое киль ...ы; **килева́я ба́лка** киль урҙаһы ♦ **килева́я ка́чка** буйға сайҡалыу (*ҡарапҡа ҡарата*)

**КИ́ЛЕЧНЫЙ,** -ая, -ое килька ...ы; **ки́лечный про́мысел** килька кәсебе

**КИЛО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "мең", "мең тапҡыр" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **киломе́тр** километр

**КИЛОВА́ТТ** *м*; *физ.* киловатт

**КИЛОГРА́ММ** *м* килограмм

**КИЛОГРА́ММОВЫЙ** и *разг.* **КИЛОГРАММО́ВЫЙ,** -ая, -ое килограмлыҡ; **килогра́ммовая ги́ря** килограмлыҡ гер

**КИЛОМЕ́ТР** *м* километр

**КИЛОМЕТРА́Ж** *м* километраж (*километрҙар менән үлсәнә торған ара*); **километра́ж пути́** юлдың километражы

**КИЛОМЕТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое километрлы; **километро́вое расстоя́ние** километрлы ара

**КИЛЬ** *м* киль (**1.** *судноның төбөн аҫҡы яҡтан беркетеп тоткан буй ағас* **2.** *ав. самолёт йәки дирижабль ҡойроғоноң руль беркетелгән вертикаль өлөшө*)

**КИЛЬВА́ТЕР** *м*; *мор.* кильватер (*карап артынан ярылып ҡалған эҙ*)

**КИЛЬВА́ТЕРНЫЙ,** -ая, -ое кильватер ...ы ♦ **кильва́терная коло́нна** *мор.* кильватер колоннаһы (*бер-бер артлы кильватер буйлап караптар теҙеме*)

**КИ́ЛЬКА** *ж* килька (*ваҡ балыҡ*)

**КИМБЕРЛИ́Т** *м*; *геол.* кимберлит (*алмаслы магма тоҡомо*)

**КИМБЕРЛИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое кимберлит ...ы; **кимберли́товые за́лежи** кимберлит ятҡылыҡтары

**КИМВА́Л** *м* кимвал (*ике еҙ тәрилкәнән торған бороңғо һуҡмалы музыка ҡоралы*)

**КИМОНО́** *с нескл.* кимоно (**1.** *япондарҙың халат шикелле киң тоташ еңле милли кейеме* **2.** *разг., спец. ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең үҙенсәлекле ең бесеме*)

**КИНГСТО́Н** *м*; *мор.* кингстон (*карап төбөндәге клапан*); **откры́ть кингсто́ны** кингстондарҙы асыу

**КИНЕМА́ТИКА** *ж* кинематика (*теоретик механиканың бүлеге*)

**КИНЕМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое кинематик; **кинемати́ческий ме́тод** кинематик ысул

**КИНЕМАТО́ГРАФ** *м* кинематограф

**КИНЕМАТОГРАФИ́СТ** *м* кинематография эшсеһе, кинематографсы

**КИНЕМАТОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое кинематограф ...ы, кинематография ...ы; **кинематографи́ческая ле́нта** кинематография таҫмаһы

**КИНЕМАТОГРАФИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое кинематографияға яраҡлы

**КИНЕМАТОГРА́ФИЯ** *ж* кинематография (*кино сәнғәте*)

**КИНЕСКО́П** *м* кинескоп (*телевизорҙа ҡулланыла торған электрон нурлы көпшә*); **кинеско́п телеви́зора** телевизор кинескобы

**КИНЕ́ТИКА** *ж* кинетика (*теоретик механика бүлеге*); **физи́ческая кине́тика** физик кинетика

**КИНЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое кинетик; **кинети́ческая тео́рия га́зов** газдарҙың кинетик теорияһы; **кинети́ческая эне́ргия** кинетик энергия

**КИНЖА́Л** *м* хәнйәр

**КИНЖА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хәнйәр ...ы; **кинжа́льный клино́к** хәнйәр йөҙө; **кинжа́льная ра́на** хәнйәр яраһы

**КИНО́** *с нескл.* кино; **звуково́е кино́** тауышлы кино; **пока́зывать кино́** кино күрһәтеү

**КИНО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "кино" һүҙенә бәйләнешле беренсе киҫәге, мәҫ.,* **кинотеа́тр** кинотеатр

**КИНОАКТЁР** *м* киноактёр; **киноактри́са** *ж* киноактриса, киноактёр ҡатын-ҡыҙ

**КИНОАППАРА́Т** *м* киноаппарат

**КИНОБОЕВИ́К** *м* кинобоевик

**КИНОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое киноварь ...ы; **кинова́рный цвет** киноварь төҫө

**КИ́НОВАРЬ** *ж* киноварь (**1.** *ҡыҙыл төҫтәге минерал, көкөртлө терегөмөш* **2.** *шунан яһалған буяу*)

**КИНОВЕ́ДЕНИЕ** *с* кино белеме

**КИНОЖУРНА́Л** *м* киножурнал

**КИНОЗВЕЗДА́** *ж*; *разг.* кино йондоҙо (*мәшһүр актрисаға ҡарата*)

**КИНОИСКУ́ССТВО** *с* кино сәнғәте

**КИНОКА́МЕРА** *ж* кинокамера (*кино төшөрөү аппараты*)

**КИНОКАРТИ́НА** *ж* кинокартина, фильм, кино; **цветна́я кинокарти́на** төҫлө кинокартина

**КИНОЛЕ́НТА** *ж* кинотаҫма

**КИНОЛЮБИ́ТЕЛЬ** *м* кино төшөрөүсе һәүәҫкәр

**КИНОМЕХА́НИК** *м* киномеханик (*киноустановканы хеҙмәтләндереүсе*)

**КИНООПЕРА́ТОР** *м* кинооператор (*киноны плёнкаға төшөрөүсе*)

**КИНОПАНОРА́МА** *ж* кинопанорама (**1.** *панорамалы фильмдар күрһәтеү өсөн тәғәйенләнгән кинотеатр* **2.** *панорамалы фильм*)

**КИНОПЕРЕДВИ́ЖКА** *ж* күсмә кино

**КИНОПЛЁНКА** *ж* кинотаҫма

**КИНОПРОЕ́КТОР** *ж* кино күрһәтеү аппараты

**КИНОПРОКА́Т** *м* кинопрокат, киноҡуртым (*фильмды күрһәтеү өсөн кинотеатрға, клубҡа ваҡытлыса биреп тороу*)

**КИНОПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* кино сәнәғәте

**КИНОРЕЖИССЁР** *м* кинорежиссёр (*фильмды ҡуйыусы, ойоштороп, тормошҡа ашырыусы төп етәксе*)

**КИНОСЕА́НС** *м* кино сеансы; **дневны́е и ве́черние киносеа́нсы** көндөҙгө һәм киске кино сеанстары

**КИНОСЕ́ТЬ** *ж* кино селтәре

**КИНОСТУ́ДИЯ** *ж* киностудия

**КИНОСЦЕНА́РИЙ** *м* киносценарий (*фильм нигеҙендәге әҙәби әҫәр*)

**КИНОСЪЁМКА** *ж* киноға төшөрөү

**КИНОСЪЁМОЧНЫЙ,** -ая, -ое киноға төшөрөү ...ы; **киносъёмочный аппара́т** киноға төшөрөү аппараты

**КИНОУСТАНО́ВКА** *ж* киноустановка (*кино күрһәтеү өсөн булған төрлө ҡорамалдар*)

**КИНОФЕСТИВА́ЛЬ** *м* кинофестиваль

**КИНОФИКА́ЦИЯ** *ж* кинофикация, кинолаштырыу

**КИНОФИ́ЛЬМ** *м* кинофильм

**КИНОФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* кинофикациялау, кинолаштырыу; **кинофици́ровать о́бласть** өлкәне кинофикациялау; **кинофици́ровать шко́лы** мәктәптәрҙе кинофикациялау

**КИНОХРО́НИКА** *ж* кинохроника (*көндәлек тормошта булған әһәмиәтле хәл ваҡиғалар төшөрөлгән ҡыҫҡаса кинокартина һәм шуның менән бәйле кино сәнғәте жанры*)

**КИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** *см.* **кида́ть 2.** *разг. кого-что* ҡалдырыу, ташлау ♦ **куда́ ни кинь гла́зом** ҡайҙа ғына ҡарама

**КИ́НУТЬСЯ** *сов. см.* **кида́ться** 3 ♦ **кровь ки́нулась в го́лову** *см.* **кровь**

**КИО́СК** *м* киоск; **кни́жный кио́ск** китап киоскыһы

**КИОСКЁР** *м* и **КИОСКЁРША** *ж*; *разг.* киоскысы, киоскыла һатыусы, киоскёр

**КИ́ПА** *ж* **1.** төргәк, бәйләм; **ки́па книг** бер төргәк китап **2.** *торг.* өйөм; **ки́па хло́пка** бер өйөм мамыҡ

**КИПАРИ́С** *м* кипарис (*ағас*), сәрүи

**КИПАРИ́СОВЫЙ** и **КИПАРИ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кипарис ...ы, сәрүи ...ы; **кипари́совая алле́я** кипарис (сәрүи) аллеяһы **2.** кипарис (сәрүи) ағасынан яһалған, кипаристан, сәрүиҙән; **кипари́совая ло́жка** сәрүи ағасынан яһалған ҡалаҡ **3.** *в знач. сущ.* **кипари́совые** *мн.*; *бот.* кипарис һымаҡтар, кипаристар (*сәрүи, артыш һ.б. үҫемлектәр ғаиләһе*)

**КИПЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **кипе́ть** 1—3; **кипе́ние воды́** һыу ҡайнауы **2.** *перен.* гөрләп тороу, ҡайнау, ташыу; **кипе́ние жи́зни** тормоштоң гөрләп тороуы; **кипе́ние страсте́й** хистәр ташыуы

**КИПЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ҡайнау; **вода́ кипи́т** һыу ҡайнай; **ча́йник кипи́т** сәйнүк ҡайнай **2.** урғыу, урғылыу, борлау, борҡорау; **река́ кипи́т** йылға урғыла **3.** уйнап (бызырлап) тороу; **кипя́щее вино́** бызырлап торған шарап **4.** *кем-чем*; *перен.* (*кишеть*) мыж килеү, мыжғып (эркелешеп) тороу, ҡайнашыу; **река́ кипе́ла ры́бой** йылғала балыҡ эркелешеп тора ине **5.** *перен.* (*протекать оживлённо*) ҡайнау, ҡайнап тороу, ташыу, гөрләү; **рабо́та кипи́т** эш гөрләй; **гнев кипи́т** асыу таша **6.** *чем* и *без доп.*; *перен.* ҡайнау, ныҡ ярһыу, ташыу; **кипе́ть гне́вом** асыу ҡайнау ♦ **кипе́ть ключо́м**: 1) урғылыу; 2) *перен.* ҡайнап то-

роу (*эш, тормош, көс-ҡеүәт һ.б.*); **кровь кипи́т** ашҡыныу, шашыу; **(как) в котле́ кипе́ть** эш менән гөж (гөр, мәж) килеү, тынғы белмәү

**КИПРЕ́Й** *м* боланут (*үлән*)

**КИПРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** боланут ...ы; **кипре́йные за́росли** боланут әрәмәлеге **2.** *сущ.* **кипре́йные** *мн.*; *бот.* боланут һымаҡтар

**КИПУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡайнап торған, күбекләнгән, ҡайнар; **кипу́чий пото́к** ҡайнап торған ағым **2.** *перен.* ярһыу, гөрләп (ҡайнап) торған, дәртле, ҡыҙыу; **кипу́чая де́ятельность** ҡыҙыу эшмәкәрлек; **кипу́чая нату́ра** дәртле тәбиғәт; **кипу́чая жизнь** гөрләп торған тормош

**КИПЯТИ́ЛЬНИК** *м* (һыу) ҡайнатҡыс

**КИПЯТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (һыу) ҡайнатыу ...ы; **кипяти́льный бак** һыу ҡайнатыу багы

**КИПЯТИ́ТЬ** *несов. что* ҡайнатыу; **кипяти́ть во́ду** һыу ҡайнатыу; **кипяти́ть бельё** кер ҡайнатыу

**КИПЯТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡайнау; **молоко́ кипяти́тся** һөт ҡайнай **2.** *перен., разг.* ҡыҙыу, ҡыҙып (туҙып) китеү; **кипяти́ться из-за пустяко́в** юҡ өсөн ҡыҙып китеү **3.** *страд. от* **кипяти́ть**

**КИПЯТО́К** *м* ҡайнар һыу; **обда́ть кипятко́м** ҡайнар һыу менән бешекләү ♦ **круто́й кипято́к** *см.* **круто́й**

**КИПЯЧЕ́НИЕ** *с см.* **кипяти́ть**

**КИПЯЧЁНЫЙ,** -ая, -ое ҡайнаған; **кипячёное молоко́** ҡайнаған һөт

**КИРА́СА** *ж* йәүшән (*тимер кейем*)

**КИРАСИ́Р** *м*; *ист.* кирасир (**1.** *йәүшән кейгән һыбайлы яугир* **2.** *Европа илдәрендә, шул иҫәптән 1917 й. тиклем Рәсәйҙә ҡайһы бер кавалерия полкының һалдаты йәки офицеры*)

**КИРГИ́ЗСКИЙ,** -ая, -ое ҡырғыҙ ...ы; **кирги́зский язы́к** ҡырғыҙ теле; **кирги́зские сте́пи** ҡырғыҙ далаһы

**КИРГИ́ЗЫ** *мн.* ҡырғыҙҙар, ҡырғыҙ халҡы // *ед.* **кирги́з** *м* ҡырғыҙ ир-аты; **кирги́зка** *ж* ҡырғыҙ ҡатын-ҡыҙы

**КИ́РЗА** и **КИРЗА́** *ж*; *разг.* кирза (*күн урынына ҡулланылған беше туҡыма*)

**КИ́РЗОВЫЙ** и **КИРЗО́ВЫЙ,** -ая, -ое кирза; **ки́рзовые сапоги́** кирза итек

**КИРИ́ЛЛИЦА** *ж* кириллица (*иҫке славян азбукаһының береһе*)

**КИРКА́** *ж* кирка, кәйлә; **долби́ть кирко́й** кәйлә менән соҡоу

**КИРПИ́Ч** *м* кирбес; **кра́сный кирпи́ч** ҡыҙыл кирбес; **обожжённый кирпи́ч** яндырылған кирбес; **изготовля́ть кирпи́ч** кирбес һуғыу

**КИРПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кирбес ...ы; **кирпи́чный заво́д** кирбес заводы **2.** кирбес, кирбестән; **кирпи́чная стена́** кирбес стена **3.** (*о цвете*) ҡыҙыл; **пла́тье кирпи́чного цве́та** ҡыҙыл кирбес төҫөндәге күлдәк ♦ **кирпи́чный чай** таҡта сәй

**КИСЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое кесейә, кесейәнән тегелгән; **кисе́йный шарф** кесейә шарф; **кисе́йное пла́тье** кесейә күлдәк ♦ **кисе́йная ба́рышня** наҙлы ҡыҙ, ҡыйпысыҡ

**КИСЕ́ЛЬ** *м* **1.** кеҫәл; **клю́квенный кисе́ль** мүк еләге кеҫәле **2.** *разг.* һүлпән кеше, ығыш ♦ **за семь вёрст киселя́ хлеба́ть** бушҡа ел ҡыуып йөрөү; **седьма́я вода́ на киселе́** ете ят, сыбыҡ осо

**КИСЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кеҫәл ...ы; **кисе́льный напи́ток** кеҫәл эсемлеге

**КИСЕ́Т** *м* янсыҡ; **кисе́т с табако́м** тәмәкеле янсыҡ

**КИСЕЯ́** *ж* кесейә (*йоҡа, утә күренмәле туҡыма*); **пла́тье из кисеи́** кесейә күлдәк

**КИСЛИ́НКА: с кисли́нкой** әскелтем; **я́блоко с кисли́нкой** әскелтем алма

**КИСЛИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* әскелтем тәм биреү; **вино́ чуть кисли́т** шарап әҙерәк әскелтем тәм бирә

**КИСЛИ́ЦА** *ж* ҡымыҙлыҡ

**КИСЛОРО́Д** *м* кислород (*химик элемент, газ*)

**КИСЛОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое кислород ...ы, кислородлы; **кислоро́дное соедине́ние** кислород берләшмәһе; **кислоро́дная среда́** кислородлы даирә (уратым) ♦ **кислоро́дное голода́ние**; **кислоро́дная недоста́точность** *мед.* организмға кислород етешмәү; **кислоро́дная поду́шка** кислородлы мендәр

**КИ́СЛО-СЛА́ДКИЙ,** -ая, -ое әскелтем-сөскөлтөм; **ки́сло-сла́дкий при́вкус** әскелтем-сөскөлтөм тәм

**КИСЛОТА́** *ж*; *хим.* кислота; **се́рная кислота́** күкерт кислотаһы

**КИСЛО́ТНОСТЬ** *ж* кислоталылыҡ; **повы́шенная кисло́тность** артыҡ кислоталылыҡ

**КИСЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое кислоталы; **кисло́тные соедине́ния** кислоталы берләшмәләр

**КИ́СЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** әсе; **ки́слое я́блоко** әсе алма **2.** әсегән; **ки́слое те́сто** әсегән ҡамыр; **ки́слая капу́ста** әсегән кәбеҫтә; **ки́слый суп** әсегән аш **3.** *перен., разг.* һытыҡ, төшөнкө; **ки́слое лицо́** һытыҡ йөҙ **4.** *хим.* кислоталы; **ки́слый раство́р** кислоталы иретмә

**КИСЛЯ́ТИНА** *ж*; *разг.* **1.** әсе нәмә **2.** *перен.* һүлпән кеше

**КИ́СНУТЬ** *несов.* **1.** әсеү; **молоко́ ки́снет** һөт әсей **2.** *перен., разг.* бойоғоу, төшөнкөләнеккә бирелеү

**КИСТА́** *ж*; *мед.* киста, һыулы шеш

**КИСТЕВО́Й,** -ая, -ое *спец.* **1.** ҡул суғы ...ы; **кистево́й суста́в** ҡул суғы быуыны **2.** *спорт.* ҡул (суғы) менән; **кистево́й уда́р** ҡул суғы менән һуғыу; **кистево́й бросо́к** ҡул суғы менән ырғытыу

**КИСТЕ́НЬ** *м*; *уст.* киҫтән, суҡмар (*боронғо ҡорал*); **хвати́ть кистенём** киҫтән менән тондороу

**КИ́СТОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **кисть** 2–4; **по́яс с ки́сточками** сәсәкле билбау; **ки́сточка виног-**

**ра́да** йөҙөм тәлгәше; **ки́сточка для бритья́** ҡырыныу бумалаһы

**КИСТЬ** *ж* **1.** ҡул, ҡул суғы; **боль в ки́сти ле́вой руки́** һул ҡул суғындағы ауыртыу **2.** бумала; **маля́рная кисть** буяу бумалаһы **3.** суҡ, сәсәк; **шаль с кистя́ми** сәсәкле шәл **4.** тәлгәш; **кисть ряби́ны** миләш тәлгәше **5.** *перен.* буяу менән төшөрөү, буяу; **э́то мо́жно переда́ть не сло́вом, а ки́стью** быны һүҙ менән түгел, тик буяу менән төшөрөп күрһәтергә була

**КИТ** *м* **1.** кит **2.** *перен., разг.* оло белгес (фигура), ҙур кеше ♦ **гренла́ндский кит** гренландия киты

**КИТАЕВЕ́ДЕНИЕ** *с* Ҡытай тураһындағы фән, синология

**КИТАИ́СТ** *м* Ҡытайҙы өйрәнеүсе (*телен, мәҙәниәтен һ.б.*)

**КИТАИ́СТИКА** *ж см.* **китаеве́дение**

**КИТА́ЙКА I** *ж* ҡытат (*күберәк күк төҫтәге тығыҙ туҡыма*)

**КИТА́ЙКА II** *ж* ваҡ алма (*емеше һәм ағасы*)

**КИТА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡытай ...ы, Ҡытай ...ы; **кита́йский фарфо́р** ҡытай фарфоры **2.** ҡытай ...ы (*ботаникала һәм зоологияла ҡайһы бер төшөнсәләрҙең аныҡлаусы өлөшө*); **кита́йская ро́за** ҡытай розаһы; **кита́йский оре́х** ҡытай сәтләүеге; **кита́йский гусь** ҡытай ҡаҙы ♦ **кита́йская гра́мота** аңлашылмай торған яҙыу; **кита́йские церемо́нии** саманан тыш ихтирамлыҡ

**КИТА́ЙЦЫ** *мн.* ҡытайҙар, ҡытай халҡы // *ед.* **кита́ец** *м* ҡытай ир-аты; **китая́нка** *ж* ҡытай ҡатын-ҡыҙы

**КИ́ТЕЛЬ** *м* китель; **вое́нный ки́тель** хәрби китель

**КИТОБО́Й** *м* кит аулаусы

**КИТОБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое кит аулау ...ы; **китобо́йный про́мысел** кит аулау кәсебе

**КИТО́ВЫЙ,** -ая, -ое кит ...ы; **кито́вый жир** кит майы; **кито́вый ус** кит мыйығы

**КИТОЛО́В** *м см.* **китобо́й**

**КИТОЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **китобо́йный**

**КИЧИ́ТЬСЯ** *несов.* маһайыу, ҡупрайыу, ҡуҡрайыу, кәпрәйеү, һауаланыу

**КИЧЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡупыҡ, ҡупым, һауалы, маһайыусан; **кичли́вый челове́к** ҡупым кеше

**КИШЕ́ТЬ** *несов.* **1.** мыжғыу, мыжғып тороу, ҡыжмырлау; **муравьи́ киша́т в мураве́йнике** иләүҙә ҡырмыҫҡалар мыжғып тора **2.** лыҡа тулыу, тулып ятыу; **о́зеро киши́т ры́бой** күлдә балыҡтар тулып ята

**КИШЕ́ЧНИК** *м*; *анат.* эсәктәр

**КИШЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое эсәк ...ы; **кише́чные заболева́ния** эсәк ауырыуҙары

**КИШКА́** *ж* **1.** *анат.* эсәк; **прямая кишка́** күтән, тура эсәк, йыуан эсәк; **двенадцатипе́рстная кишка́** бөйән; **за́ворот кишо́к** эсәк сыуалыуы **2.** *разг.* эсәк, шланг; **пожа́рная кишка́** янғын шлангыһы ♦ **кишка́ тонка́** *у кого* тиреһе йоҡа, ҡулынан (эш) килерлек түгел

**КИШЛА́К** *м* ҡышлаҡ (*үзбәктәрҙә, тажиктарҙа ауыл*)

**КИШЛА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡышлаҡ ...ы; **кишла́чная шко́ла** ҡышлаҡ мәктәбе

**КИШМИ́Ш** *м* кишмиш (*һөйәкһеҙ йөҙөм*)

**КИШМЯ́: кишмя́ кише́ть** мыжғып (ҡайнап) тороу

**КИЯ́НКА** *ж* ағас сүкеш

**КЛАВЕСИ́Н** *м*; *муз.* клавесин (*ҡыллы-баҫмаҡлы боронғо музыка ҡоралы*)

**КЛАВИАТУ́РА** *ж* баҫмаҡтар, клавиатура; **клавиату́ра роя́ля** рояль баҫмаҡтары; **клавиату́ра пи́шущей маши́нки** яҙыу машинкаһы баҫмаҡтары

**КЛА́ВИШ** *м* и **КЛА́ВИША** *ж* баҫмаҡ, клавиш; **кла́виши аккордео́на** аккордеон баҫмаҡтары

**КЛА́ВИШНЫЙ,** -ая, -ое баҫмаҡлы, клавишлы; **кла́вишный инструме́нт** баҫмаҡлы (музыка) ҡорал(ы)

**КЛАД** *м* **1.** хазина; **найти́ клад** хазина табыу **2.** *о ком-чём-л.*; *разг.* хазина, табыш; **жена — су́щий клад** ҡатын — ысын табыш

**КЛА́ДБИЩЕ** и *уст.* **КЛАДБИ́ЩЕ** *с* зыярат, ҡәберлек

**КЛАДБИ́ЩЕНСКИЙ,** -ая, -ое зыярат ...ы; **кладби́щенский сто́рож** зыярат ҡараусылсыһы

**КЛА́ДЕЗЬ** *м* **1.** *трад.-поэт.* ҡоҙоҡ, ҡойо **2.** *чего-л.*; *перен., высок.* сығанаҡ, шишмә; **кла́дезь зна́ний** белем сығанағы ♦ **кла́дезь прему́дрости** (*о ком-л.*) аҡыл эйәһе

**КЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **класть**; **производи́ть кла́дку стены́** стена (диуар) һалыу **2.** ҡоролма; **разобра́ть часть кла́дки** ҡоролманың бер өлөшөн һүтеү **3.** өйөм; **кла́дка дров** утын өйөмө

**КЛАДОВА́Я** *ж* келәт, кладовой

**КЛАДОВЩИ́К** *м* и **КЛАДОВЩИ́ЦА** *ж* келәттә эшләгән кеше, кладовщик (*келәт хужаһы*)

**КЛАДЬ** *ж собир.* йөк; **ка́мера хране́ния ручно́й кла́ди** ҡул йөгө һаҡлау камераһы; **тяжёлая кладь** ауыр йөк

**КЛА́КСОН** и **КЛАКСО́Н** *м* клаксон (*автомобиль, мотоцикл, трактор сигналы яйланмаһы*)

**КЛАН** *м* клан (*бер ырыу халҡы йәки һайланма социаль төркөм*)

**КЛА́НЯТЬСЯ** *несов.* **1.** *кому-чему* баш эйеү (иҫәнләшеү); **кла́няться знако́мому** таныш менән баш эйеп иҫәнләшеү **2.** *кому-чему* (*передавать привет*) сәләм әйтеү (тапшырыу); **кла́няйтесь ему́ от меня́** уға минән сәләм әйтегеҙ **3.** *кому, перед кем*; *перен.* (*униженно просить*) инәлеү, ялбарыу; **он ни пе́ред кем не кла́нялся** ул бер кем алдында ла инәлмәне

**КЛА́ПАН** *м* **1.** *тех.* клапан; **предохрани́тельный кла́пан** һаҡлағыс клапан **2.** *анат.* ҡапҡас; **серде́чный кла́пан** йөрәк ҡапҡасы **3.** *портн.*

япҡыс, ҡапҡас, ҡаплама; **карма́нный кла́пан** кеҫә япҡысы

**КЛАРНЕ́Т** *м*; *муз.* кларнет (*тынлы музыка ҡоралы*)

**КЛАРНЕТИ́СТ** *м* кларнетсы

**КЛАСС** *м* **1.** (*общественная группа*) синыф; **рабо́чий класс** эшсе синыф **2.** (*группа школьников*) синыф, класс; **пя́тый класс** бишенсе синыф **3.** (*подразделение в систематике животных и растений*) класс; **класс млекопита́ющих** имеҙеүселәр класы **4.** кластлы; **приёмник вы́сшего кла́сса** юғары кластлы радиоалғыс; **води́тель пе́рвого кла́сса** беренсе кластлы водитель; **каю́та пе́рвого кла́сса** беренсе кластлы каюта; **сове́тник юсти́ции пе́рвого кла́сса** беренсе кластлы юстиция кәңәшсеһе

**КЛА́ССИК** *м* классик (мәшһүр эшмәкәр); **кла́ссик литерату́ры** әҙәбиәт классигы; **чита́ть кла́ссиков** классиктарҙы уҡыу

**КЛА́ССИКА** *ж собир.* классика (*өлгө, иң яҡшыларҙан*); **кла́ссика башки́рской литерату́ры** башҡорт әҙәбиәте классикаһы

**КЛАССИФИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое классификациялау ...ы; **классификацио́нная схе́ма** классификациялау схемаһы

**КЛАССИФИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **классифици́ровать**; **занима́ться классифика́цией минера́лов** минералдарҙы классификациялау менән шөғөлләнеү **2.** классификация; **классифика́ция расте́ний** үҫемлектәр классификацияһы

**КЛАССИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* классификациялау, кластарға бүлеү; **классифици́ровать поня́тия** төшөнсәләрҙе кластарға бүлеү

**КЛАССИЦИ́ЗМ** *м* классицизм (*XVIII б. аҙағында һәм XIX б. башында әҙәбиәт һәм сәнғәттәге антик үрнәктәргә эйәреүгә нигеҙләнгән йүнәлеш*)

**КЛАССИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** классик (*классиктар тыуҙырған әҫәр*); **класси́ческая му́зыка** классик музыка; **класси́ческое произведе́ние** классик әҫәр **2.** (*типичный, характерный*) классик, типик, йыш осраусан; **класси́ческая по́за йо́гов** йогтарҙың классик позаһы **3.** *разг.* (*замечательный*) шәп, үтә һәйбәт, бик яҡшы, бына тигән, тап килгән, һоҡландырғыс; **класси́ческий отве́т** бына тигән яуап; **класси́ческий приме́р** шәп (һәйбәт) миҫал **4.** (*античный*) классик; **класси́ческая красота́** классик матурлыҡ; **класси́ческий нос** классик танау **5.** (*связанный с изучением древнегреческого, латинского языков и античной литературы*) классик; **класси́ческие языки́** классик телдәр; **класси́ческое образова́ние** классик белем

**КЛА́ССНЫЙ,** -ая, -ое **1.** класс (синыф) ...ы; **кла́ссный руководи́тель** синыф етәксеһе **2.** кластлы; **кла́ссное су́дно** кластлы судно; **кла́ссный води́тель** кластлы йөрөтөүсе **3.** *разг.* бик яҡшы (шәп); **обе́д был кла́ссный** төшкө аш бик шәп булды

**КЛА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое синфи; **кла́ссовая борьба́** синфи көрәш; **кла́ссовая то́чка зре́ния** синфи ҡараш

**КЛАСТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* яткырыу, һалыу, ҡуйыу; **класть ребёнка в посте́ль** баланы йоҡларға һалыу; **класть кни́ги на ме́сто** китаптарҙы урынына ҡуйыу; **класть плато́к в карма́н** ҡульяулыҡты кеҫәгә һалыу **2.** *кого-что* һалыу, баҫыу, һуғыу; **класть де́ньги в сберба́нк** аҡсаны һаҡлыҡ банкыһына һалыу; **класть в больни́цу** хәстәханаға һалыу; **класть печа́ть** мөһөр баҫыу; **класть клеймо́** тамға һалыу; **класть ка́шу в таре́лку** тәрилкәгә бутҡа һалыу; **класть са́хар в чай** сәйгә шәкәр һалыу; **класть ма́сло в ка́шу** бутҡаға май һалыу **3.** *что* яғыу, буяу, һалыу; **класть кра́ску на холст** киндергә буяу яғыу; **класть косме́тику** косметика һалыу **4.** *что* һалыу, сығарыу; **класть фунда́мент** нигеҙ һалыу; **класть печь** мейес сығарыу **5.** *что*; *перен.* һалыу, түгеү; **класть все си́лы в рабо́ту** бар көстө эшкә һалыу ♦ **класть го́лову (жизнь, живо́т)** *за кого* и *без доп.* баш һалыу, һәләк булыу; **класть ору́жие** ҡорал һалыу (*үҙ-үҙеңде еңелгән тип таныу*); **класть (земны́е) покло́ны** баш эйеү; **класть пятно́** *на кого-что* тап төшөрөү, хурлау; **класть я́йца** йомортҡа һалыу; **класть зу́бы на по́лку** ауыҙҙы сөйгә элеү (*ас ултырыу*); **класть в карма́н** үҙләштереү, үҙ кеҫәһенә һалыу (тығыу); **класть в осно́ву** нигеҙ итеп алыу; **класть в рот** *кому* ауыҙына сәйнәп һалыу; **класть под сукно́** баҫырып һалып ҡуйыу; **па́льцы в рот не клади́** ауыҙ асып торма, уяу бул

**КЛЁВ** *м см.* **клева́ть** 3; **сего́дня был хоро́ший клёв** бөгөн балыҡ яҡшы ҡапты

**КЛЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* (*о птицах*) сүпләү, суҡыу; **ку́ры клюю́т зерно́** тауыҡтар ашлыҡ сүпләй **2.** (*ударить клювом*) суҡыу **3.** *без доп.* (*о рыбе*) ҡабыу, сиртеү; **рыба клева́ла беспреста́нно** балыҡ бер туҡтауһыҙ ҡабып торҙо **4.** *безл.*; *перен., разг., шутл.* барып (килеп) сығыу; **де́ло клюёт** эш килеп сыға ♦ **клева́ть но́сом** йоҡо баҫыу, йоҡомһорап ултырыу; **де́нег ку́ры не клюю́т** *у кого* аҡсаһы бик күп, тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел (бөтмәҫ)

**КЛЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** суҡыу; **насе́дка клюётся** баҫҡан тауыҡ суҡый **2.** (*клевать друг друга*) суҡышыу

**КЛЕ́ВЕР** *м* клевер, туҡранбаш; **лугово́й кле́вер** болон туҡранбашы

**КЛЕ́ВЕРНЫЙ,** -ая, -ое туҡранбаш ...ы; **кле́верные семена́** туҡранбаш орлоғо

**КЛЕВЕТА́** *ж* яла, хөсөт; **наводи́ть клевету́** *на кого-л. кемгәлер* яла яғыу

**КЛЕВЕТА́ТЬ** *несов. на кого* и *без доп.* яла яғыу

**КЛЕВЕТНИ́К** *м* и **КЛЕВЕТНИ́ЦА** *ж* яла яғыусы

**КЛЕВЕТНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ялған, яла яғыу ...ы; **клеветни́ческие приёмы** яла яғыу ысулдары; **клеветни́ческие измышле́ния** ялған уйҙырмалар; **клеветни́ческие слу́хи** ялған хәбәрҙәр

**КЛЕВО́К** *м* суҡыу

**КЛЕЕВАРЕ́НИЕ** *с* елем ҡайнатыу

**КЛЕЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** елем ...ы; **клеево́й за́пах** елем еҫе **2.** елемле; **клеева́я кра́ска** елемле буяу

**КЛЕЁНКА** *ж* клеёнка; **то́нкая клеёнка** йоҡа клеёнка; **накры́ть стол клеёнкой** өҫтәлгә клеёнка ябыу

**КЛЕЁНЧАТЫЙ,** -ая, -ое клеёнка, клеёнканан эшләнгән, клеёнка менән тышланған; **клеёнчатый портфе́ль** клеёнка портфель; **клеёнчатый дива́н** клеёнка менән тышланған диван

**КЛЕЁНЫЙ,** -ая, -ое *спец., разг.* **1.** (*пропитанный, смазанный клеем*) елемле, елемләнгән; **клеёная бума́га** елемле ҡағыҙ **2.** елемләп йәбештерелгән; **клеёная фане́ра** елемләп йәбештерелгән фанера

**КЛЕИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* йәбештереү ...ы; **клеи́льный стано́к** йәбештереү станогы

**КЛЕ́ИТЬ** *несов. что* елемләү, йәбештереү, елем менән йәбештереү; **кле́ить конве́рт** конверт йәбештереү

**КЛЕ́ИТЬСЯ** *несов.* **1.** йәбешеү; **бума́га легко́ кле́ится** ҡағыҙ еңел йәбешә **2.** *перен., разг.* яйланыу, рәтләнеү; **де́ло кле́ится** эш рәтләнә **3.** *страд. от* **кле́ить**

**КЛЕЙ** *м* елем; **столя́рный клей** ағас елеме; **синтети́ческий клей** синтетик елем

**КЛЕ́ЙКА** *ж см.* **кле́ить**; **кле́йка фане́ры** фанера йәбештереү

**КЛЕ́ЙКИЙ,** -ая, -ое йәбешкәк, елемле; **кле́йкие ли́стья** йәбешкәк япраҡтар; **кле́йкая бума́га для мух** себен өсөн елемле ҡағыҙ

**КЛЕЙКОВИ́НА** *ж* елемсә (*бөртөклө ашлыҡтағы аҡһым матдә*)

**КЛЕЙМЕ́НИЕ** *с см.* **клейми́ть** 1; **клейме́ние скота́** малды тамғалау

**КЛЕЙМЁНЫЙ,** -ая, -ое тамғалы, келәймәле; **клеймёный това́р** тамғалы тауар; **клеймёный скот** тамғалы мал

**КЛЕЙМИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** тамғалау, тамға һалыу (һуғыу); **клейми́ть груз** йөктө тамғалау **2.** *перен.* хурлау, ғәйепләү, фаш итеү; **клейми́ть позо́ром** хур итеү (оятҡа ҡалдырыу, оятлы итеү)

**КЛЕЙМО́** *с* **1.** тамға, келәймә; **фабри́чное клеймо́** фабрика келәймәһе; **клеймо́ на ло́шади** атҡа һуғылған тамға **2.** *перен., книжн.* тамға; **клеймо́ позо́ра** хурлыҡ тамғаһы

**КЛЕ́ЙСТЕР** *м* клейстер (*он йәки крахмал елеме*)

**КЛЁКОТ** *м* саңҡ-саңҡ итеү, саңҡыу, саңҡылдау; **клёкот орла́** бөркөт саңҡыуы

**КЛЕКОТА́ТЬ** *несов.* саңҡыу, саңҡылдау

**КЛЕ́ММА** *ж* клемма (*электр сымдарын аппаратҡа тоташтырыусы ҡулайлама*)

**КЛЁН** *м* саған

**КЛЕНО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** саған ...ы; **клено́вый лист** саған япрағы **2.** саған, сағандан яһалған; **клено́вый стол** саған өҫтәл

**КЛЕПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сигәләү ...ы; **клепа́льные рабо́ты** сигәләү эштәре; **клепа́льная маши́на** сигәләү машинаһы

**КЛЕПА́ЛЬЩИК** *м* сигәләүсе, синәүсе

**КЛЁПАНЫЙ,** -ая, -ое сигәле, сигәләп яһалған; **клёпаный котёл** сигәле ҡаҙан

**КЛЕПА́ТЬ** *несов. что* **1.** сигәләү, синәү; **клепа́ть желе́зные пласти́нки** тимер пластинкаларҙы сигәләү **2.** беркетеү, тоташтырыу; **клепа́ть кро́влю** ҡыйыҡ тимерен беркетеү **3.** тапау, сүкеү; **клепа́ть косу́** салғы сүкеү

**КЛЁПКА I** *ж см.* **клепа́ть**; **маши́нная клёпка** машина менән сигәләү

**КЛЁПКА II** *ж* мискә таҡтаһы

**КЛЁПОЧНЫЙ,** -ая, -ое сигәләү ...ы, сүкеү ...ы; **клёпочная мастерска́я** сигәләү оҫтаханаһы; **клёпочный стано́к** сигәләү станогы

**КЛЕПТОМА́НИЯ** *ж* клептомания (*урлашырға ынтылдыра торған психик ауырыу*)

**КЛЕРИКА́Л** *м* клерикал (*клерикализм яҡлы кеше*)

**КЛЕРИКАЛИ́ЗМ** *м* клерикализм (*сит илдәрҙә илдең сәйәси һәм мәҙәни тормошона сиркәү йоғонтоһон көсәйтергә ынтылған ағым*)

**КЛЕРИКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое клерикаль; **клерика́льное направле́ние** клерикаль йүнәлеш

**КЛЕРК** *м* клерк (*ҡайһы бер илдәрҙә контора хеҙмәткәре*)

**КЛЁСТ** *м* шыршы турғайы

**КЛЕ́ТКА I** *ж* **1.** (*для птиц, животных*) ситлек; **тигр в кле́тке** ситлектә ултырған юлбарыҫ **2.** шаҡмаҡ; **кле́тки ша́хматной доски́** шахмат таҡтаһы шаҡмаҡтары; **ткань в кле́тку** шаҡмаҡлы туҡыма ♦ **грудна́я кле́тка** *анат.* күкрәк ситлеге; **ле́стничная кле́тка** баҫҡыстар араһындағы майҙансыҡ

**КЛЕ́ТКА II** *ж*; *биол.* күҙәнәк; **не́рвная кле́тка** нервы күҙәнәге; **расти́тельные кле́тки** үҫемлек күҙәнәктәре

**КЛЕ́ТОЧНЫЙ I,** -ая, -ое ситлек ...ы; **кле́точное разведе́ние но́рки** шәшкене ситлектә үрсетеү

**КЛЕ́ТОЧНЫЙ II,** -ая, -ое *биол.* күҙәнәк ...ы; **кле́точное ядро́** күҙәнәк йәҙрәһе

**КЛЕТУ́ШКА** *ж* **1.** бәләкәй келәт **2.** *разг.* тар бүлмә, ҡумар, ҡумартай бүлмә

**КЛЕТЧА́ТКА** *ж* **1.** *биол.* күҙәнәклек (*үҫемлек күҙәнәктәре ҡабығын барлыҡҡа килтергән матдә*) **2.** күҙәнәкле туҡыма; **жирова́я клетча́тка** күҙәнәкле майлы туҡыма

**КЛЕ́ТЧАТЫЙ I,** -ая, -ое шаҡмаҡлы, сатраш; **кле́тчатый плато́к** шаҡмаҡлы яулыҡ

**КЛЕ́ТЧАТЫЙ II,** -ая, -ое *биол.* күҙәнәкле; **кле́тчатое строе́ние органи́зма** организмдың күҙәнәкле төҙөлөшө

**КЛЕТЬ** *ж* **1.** келәт **2.** күтәрмә, клеть (*шахтаға төшөрөү һәм унан күтәреү өсөн эшләнгән ҡоролма*)

**КЛЁЦКИ** *мн.* (*ед.* **клёцка** *ж*) сумар; **суп с клёцками** сумарлы аш

**КЛЁШ** *м* **1.** клёш (*киң итәкле күлдәк йәки киң балаҡлы салбар*) **2.** *в знач. неизм. прил.* клёш; **юбка клёш** клёш итәк

**КЛЕШНЯ́** *ж* ҡыҫҡыс, ҡыҫа

**КЛЕЩ** *м* талпан; **клещ соба́чий** эт талпаны; **клещи́ таёжные** тайга талпандары

**КЛЕЩЕВИ́НА** *ж* кенә уты (*орлоғонан касторка майы алынған үҫемлек*)

**КЛЕЩИ́** и **КЛЕ́ЩИ** *мн.* **1.** ҡыпсыуыр; **кузне́чные клещи́** тимерлек ҡыпсыуыры **2.** *воен.* ҡоршау; **попа́сть в клещи́** ҡоршауға эләгеү ♦ **клеща́ми не вы́тянешь (не вы́тащишь)** бер ауыҙ һүҙ ҙә әйттерә алмаҫһың

**КЛИЕ́НТ** *м* и **КЛИЕ́НТКА** *ж* клиент (**1.** *тегенсегә, парикмахерға, адвокатҡа һ.б. эш-йомош менән килеүсе* **2.** *һәр ваҡыт заказ биреүсе, һатып алыусы* **3.** *берәй кредит, сауҙа йәки сәнәғәт ойошмаһы хеҙмәтләндергән ойошма йәки кеше*)

**КЛИЕНТУ́РА** *ж собир.* клиенттар

**КЛИ́ЗМА** *ж* клизма; **поста́вить кли́зму** клизма ҡуйыу

**КЛИК** *м* **1.** *высок.*, *трад.-поэт.* оран; **промча́лся клик** оран яңғыраны **2.** сыңрау; **клик журавле́й** торналар сыңрауы

**КЛИ́КА** *ж* өйөр, туп (*яуыз ниәт менән ойошҡан кешеләр төркөмө*); **престу́пная кли́ка** енәйәтселәр өйөрө

**КЛИ́КАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что*; *прост.* саҡырыу, ҡысҡырыу; **вас кли́чет кто́-то** һеҙҙе кемдер саҡыра **2.** *без доп.* саңҡыу, ҡаңҡылдау; **ди́кие пти́цы кли́чут по-осо́бенному** ҡырағай ҡоштар үҙенсәлекле саңҡый

**КЛИ́КНУТЬ** *сов.* **1.** һөрәнләп алыу, ҡысҡырыу **2.** *кого*; *разг.* саҡырыу, саҡырып алыу; **кли́кни его́ сюда́** уны бында саҡыр ♦ **кли́кнуть клич** *см.* **клич**

**КЛИКУ́ША 1.** *ж* быума ауырыулы ҡатынҡыҙ **2.** *м* и *ж*; *перен.*, *разг.* ҡысҡырып һөйләшкән кеше

**КЛИКУ́ШЕСТВО** *с* **1.** быума ауырыуы **2.** *перен.*, *разг.* ҡысҡырыныу, шапырынып һөйләү

**КЛИ́МАКС** и **КЛИМАКТЕ́РИЙ** *м*; *мед.* ырыуҙан ҡалыу, климакс

**КЛИМАКТЕРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ырыуҙан ҡалыу ...ы, климакс ...ы; **климактери́ческий пери́од** ырыуҙан ҡалыу осоро

**КЛИ́МАТ** *м* **1.** климат; **морско́й кли́мат** диңгеҙ климаты; **уме́ренный кли́мат** уртаса климат **2.** *какой, чего*; *перен.* хәл, мөнәсәбәт; **полити́ческий кли́мат** сәйәси хәл; **кли́мат в коллекти́ве** коллективтағы мөнәсәбәт

**КЛИМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое климат ...ы; **климати́ческие усло́вия** климат шарттары

**КЛИМАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое климатология ...ы; **климатологи́ческий институ́т** климатология институты

**КЛИМАТОЛО́ГИЯ** *ж* климатология (*һауа торошо тураһында фән*)

**КЛИН** *м* **1.** шына; **деревя́нный клин** ағас шына; **вбить клин** шына ҡағыу **2.** (*в одежде*) ҡыйыҡ; **вшить клин** ҡыйыҡ индереп (ҡушып) тегеү **3.** *с.-х.* баҫыу, ҡыр; **ози́мый клин** ужым баҫыуы **4.** *в знач. нареч.* **кли́ном** шына һымаҡ, өсмөйөш; **борода́ кли́ном** шына (кәзә) һаҡал; **дви́гаться кли́ном** өсмөйөш яһап барыу (осоу) ♦ **вбить клин** *между кем* араны боҙоу, татыулыҡты ебәреү, һыуындырыу; **клин кли́ном вышиба́ть (выбива́ть)** шынаны шына менән сығарыу; **кли́ном не вы́шибешь** ныҡ тороу; **свет (не) кли́ном сошёлся** *на ком-чём* донъя шуның менән емерелмәй, *кемгә* (*нимәгә*) көн ҡалмаған, әллә кем түгел әле

**КЛИ́НИКА** *ж* клиника (*дауалау менән бергә фәнни һәм уҡытыу эштәрен алып барған медицина учреждениеһы*); **глазна́я кли́ника** күҙ клиникаһы

**КЛИНИЦИ́СТ** *м* клиницист, клиника табибы

**КЛИНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** клиника ...ы; **клини́ческие усло́вия** клиника шарттары; **клини́ческое лече́ние** клиникала дауаланыу **2.** *мед.* клиник, дауалана торған (алырлыҡ); **клини́ческие фо́рмы заболева́ния** ауырыуҙарҙың клиник формалары ♦ **клини́ческая смерть** клиник үлем (*тын алыш һәм йөрәктең тибеше туҡтағандан һуң организмдың әле тере булған ҡыҫҡа ғына ваҡыты*)

**КЛИ́НКЕР** *м*; *спец.* клинкер (**1.** *утә нык, дым һеңдермәй торған кирбес төрө* **2.** *яндырылған цемент киҫәктәре*)

**КЛИНОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое шына һымаҡ (кеүек), осло; **клинови́дные ли́стья** шына кеүек япраҡтар; **клинови́дная боро́дка** осло (кәзә) һаҡал; **клинови́дная кость** *анат.* шына һымаҡ һөйәк

**КЛИНО́К** *м* **1.** йөҙ; **са́бельный клино́к** ҡылыс йөҙө; **клино́к кинжа́ла** хәнйәр йөҙө **2.** ҡылыс, хәнйәр, бысаҡ

**КЛИНООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **клинови́дный**

**КЛИНОПИ́СНЫЙ,** -ая, -ое шына яҙыулы; **клинопи́сная на́дпись** шына яҙыулы яҙма

**КЛИ́НОПИСЬ** *ж* **1.** (*способ письма*) шына яҙыу (*боронғо Көнбайыш Азия халыҡтарының яҙыу ысулы*) **2.** шына яҙыулы текст

**КЛИ́ПЕР** *м* клипер (*тиҙ йөрөшлө өс елкәнле кәмә*)

**КЛИ́ПСЫ** *мн.* (*ед.* **кли́пса** *ж*) клипсы (*колаҡты тишмәйенсә ҡыҫтырып тағыла торған һырға*)

**КЛИ́РИНГ** *м*; *фин.* клиринг, ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеү (*һатыу-алыу эшендә*)

**КЛИ́РИНГОВЫЙ,** -ая, -ое *фин.* клиринг ...ы, ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеү ...ы; **кли́ринговое соглаше́ние** ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеү буйынса килешеү

**КЛИ́РОС** *м* клирос (**1.** *сиркәүҙә йырсылар урыны* **2.** *собир. сиркәү хоры*)

**КЛИЧ** *м* оран, һөрән; **боево́й клич** һуғышсан оран ♦ **кли́кнуть клич** оран һалыу

**КЛИ́ЧКА** *ж* **1.** (*имя животных*) исем **2.** (*прозвище, даваемое человеку*) ҡушамат

**КЛИШЕ́** *с нескл.* клише (**1.** *матбағала баҫыу өсөн металл, ағас йәки башҡа нәмәгә төшөрөлгән һүрәт, һыҙма һ.б.* **2.** *күсм. үтә йыш ҡулланылған әйтем*)

**КЛОА́КА** *ж* клоака (**1.** *Боронғо Римда бысраҡ һыу ағып төшөү өсөн эшләнгән ер аҫты каналы* **2.** *бысраҡ йыйыу урыны* **3.** *хәшәрәт урын, хәшәрәт* **4.** *биол. ҡайһы бер хайуандарҙа тиҙәк, бәүел һәм енес бүлендеге сығыу өсөн дөйөм бер юл*)

**КЛОБУ́К** *м*; *церк.* клобук (*монахтарҙың баш кейеме*)

**КЛОК** *м* **1.** тотам, услам, усма; **клок воло́с** бер тотам сәс; **клок се́на** бер усма бесән **2.** киҫәк; **разорва́ть в кло́чья** киҫәктәргә йыртҡылау

**КЛОКОТА́НЬЕ** *с см.* **клокота́ть**; **клокота́нье в груди́** күкрәктәге ғырылдау

**КЛОКОТА́ТЬ** *несов.* **1.** борҡорау, урғылыу, шарлау, гөбөрләү; **в котле́ клокота́ла вода́** ҡаҙанда һыу урғылып ҡайнаны **2.** *чаще безл.* (*хрипеть*) ғырылдау, ғыр-ғыр килеү; **в го́рле клокота́ло** тамаҡ ғыр-ғыр килде **3.** *перен.* урғылыу, ҡайнау; **ра́дость клокота́ла в нём** уның шатлығы урғылып тора ине

**КЛОНИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* бөгөү, эйелдереү, эйеү, ҡыйшайтыу, ҡырынайтыу; **ве́тер кло́нит верху́шки дере́вьев** ел ағас баштарын эйелдерә; **ло́дку клони́ло на́бок** кәмә ҡыйшайҙы **2.** *кого* (*одолевать — о сне, дремоте*) (йоҡо) баҫыу, йоҡомһоратыу; **его́ кло́нит ко сну́** *безл.* ул йоҡомһорай, уны йоҡо баҫа **3.** *что*; *перен.* алып барыу, тартыу; **клони́ть де́ло к разры́ву** эште өҙөргә табан алып барыу

**КЛОНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** эйелеү, бөгөлөү; **ве́тви де́рева клони́лись до са́мой земли́** ағас ботаҡтары ергә тиклем эйелгән **2.** *к чему*; *перен.* ауыу, ауышыу, һырышыу, яҡынлашыу; **день кло́нится к ве́черу** көн кискә ауыша; **к чему́ всё э́то кло́нится** быларҙың барыһы нимәгә бара

**КЛОП** *м* **1.** ҡандала; **древе́сный клоп** ағас ҡандалаһы **2.** *разг.*, *шутл.* (*о малыше*) бөрсә

**КЛОПИ́НЫЙ,** -ая, -ое ҡандала ...ы; **клопи́ный за́пах** ҡандала еҫе

**КЛОПО́ВНИК** *м* **1.** *прост.* ҡандала ояһы **2.** *бот.* ҡандалагөл (*ҡандалаға ҡаршы ҡулланылған үләндәрҙең дөйөм исеме*)

**КЛОПО́ВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **клопи́ный**

**КЛОПОМО́Р** *м* ҡандала ағыуы

**КЛО́УН** *м* клоун, кәмитсе

**КЛОУНА́ДА** *ж* клоунада (*циркта клоундар ҡатнашлығы менән башҡарылған сығыш*)

**КЛО́УНСКИЙ,** -ая, -ое клоун ...ы, кәмитсе ...ы; **кло́унская ма́ска** кәмитсе битлеге

**КЛОХТА́НЬЕ** *с* ҡытҡылдау, ҡыт-ҡыт килеү; **кури́ное клохта́нье** тауыҡ ҡытҡылдауы

**КЛОХТА́ТЬ** *несов.* **1.** ҡытҡылдау, ҡыт-ҡыт килеү (итеү); **насе́дка кло́хчет** тауыҡ ҡытҡылдай **2.** *перен.*, *разг.* мығырлау, мығыр-мығыр килеү

**КЛОЧКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое уҡмаш, өҙөк-өҙөк, өйкөм-өйкөм; **клочкова́тая шерсть** уҡмаш йөн; **клочкова́тые ту́чи** өйкөм-өйкөм болоттар

**КЛОЧО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **клок 2.** (*небольшой участок чего-л.*) ҡарыш, киҫәк; **клочо́к земли́** бер ҡарыш ер

**КЛУБ I** *м* **1.** ҙур йомғаҡ **2.** *чего* өйөрмә (*өйкөм-өйкөм булып күтәрелгән саң-туҙан, төтөн һ.б. ҡарата*); **клубы́ ды́ма** борҡорап сыҡҡан төтөн; **клубы́ пы́ли** саң өйөрмәһе

**КЛУБ II** *м* клуб; **се́льский клуб** ауыл клубы; **молодёжный клуб** йәштәр клубы; **клуб следопы́тов** эҙәрмәндәр клубы

**КЛУ́БЕНЬ** *м* бүлбе; **клу́бень карто́феля** картуф бүлбеһе

**КЛУБИ́ТЬ** *несов.* *что* **1.** *перен.* өйөрөлтөп күтәреү, борҡотоу; **клуби́ть пыль** саңды өйөрөлтөп күтәреү **2.** *уст. см.* **клуби́ться**

**КЛУБИ́ТЬСЯ** *несов.* борҡоу, борҡолоу, өйөрөлөп күтәрелеү; **пыль клуби́тся по доро́ге** юл буйында саң борҡой

**КЛУБНЕПЛО́ДЫ** *мн.* (*ед.* **клубнепло́д** *м*) бүлбеләләр (*бүлбеһе ашарға яраҡлы үҫемлектәр*)

**КЛУБНИ́КА** *ж* ер еләге

**КЛУБНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ер еләге ...ы; **клубни́чный лист** ер еләге япрағы; **клубни́чное варе́нье** ер еләге ҡайнатмаһы

**КЛУ́БНЫЙ,** -ая, -ое клуб ...ы; **клу́бная рабо́та** клуб эше

**КЛУБО́К** *м*; *в разн. знач.* йомғаҡ; **клубо́к ше́рсти** йөн йомғағы; **клубо́к ни́ти** еп йомғағы; **клубо́к мы́слей** уйҙар йомғағы; **клубо́к противоре́чий** ҡаршылыҡтар йомғағы; **клубо́к ды́ма** төтөн йомғағы ♦ **сверну́ться (сжа́ться, съёжиться) в клубо́к (клубко́м)** бөгәрләнеп ятыу

**КЛУ́МБА** *ж* сәскәлек, сәскә түтәле; **разби́ть клу́мбу** сәскә түтәле яһау

**КЛЫК** *м* ҡаҙыҡ теш; **во́лчьи клыки́** бүренең ҡаҙыҡ тештәре

**КЛЫКА́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҙур ҡаҙыҡ тешле, ыржайып торған ҡаҙыҡ тешле; **клыка́стая пасть** ыржайып торған ҡаҙыҡ тешле ауыҙ

**КЛЮВ** *м* суҡыш; **о́стрый клюв** осло суҡыш; **клюв орла́** бөркөт суҡышы

**КЛЮКА́** *ж* кәкре башлы таяҡ

**КЛЮ́КВА** *ж* мүк еләге (*үҫемлеге һәм емеше*) ♦ **вот так клю́ква!** *прост.* бына һиңә кәрәк булһа!, бына һиңә! (*көтөлмәгән күңелһеҙ хәлвәҡиғаға ҡарата*); **разве́систая клю́ква** *шутл.* бынағайыш (*ғәҙәти булмаған нәмәгә ғәжәпләнгәндә әйтелә*)

**КЛЮ́КВЕННЫЙ,** -ая, -ое мүк еләге ...ы; **клю́квенный сок** мүк еләге һуты; **клю́квенный кисе́ль** мүк еләге кеҫәле

**КЛЮ́НУТЬ** *сов. см.* **клева́ть**

**КЛЮЧ I** *м* **1.** *в разн. знач.* асҡыс; **ключ от две́ри** ишек асҡысы; **га́ечный ключ** гайка асҡысы; **ключ зажига́ния** тоҡандырыу асҡысы; **найти́ ключ к се́рдцу** йөрәккә асҡыс табыу; **ключ к ши́фру** шифр асҡысы **2.** *муз.* билдә; **скрипи́чный ключ** скрипка билдәһе; **басо́вый ключ** бас билдәһе (*ҡалын тауыш билдәһе*)

**КЛЮЧ II** *м* шишмә, болаҡ, күҙләүек; **холо́дный ключ** һыуыҡ шишмә (болаҡ) ♦ **бить ключо́м**; **кипе́ть ключо́м**: 1) урғылып (бәрелеп, ҡайнап) сығыу; 2) *перен.* ҡайнау; **жизнь бьёт ключо́м** тормош ҡайнай (гөрләй)

**КЛЮЧЕВО́Й I,** -ая, -ое **1.** асҡыс ...ы, асҡыслы; **ключево́е отве́рстие замка́** йоҙаҡтың асҡыс тишеге **2.** мөһим; **ключева́я пози́ция** *воен.* мөһим урын; **ключева́я пробле́ма** мөһим мәсьәлә

**КЛЮЧЕВО́Й II,** -ая, -ое шишмә ...ы, болаҡ ...ы; **ключева́я вода́** шишмә һыуы

**КЛЮЧИ́ЦА** *ж*; *анат.* умрау, умрау һөйәге; **слома́ть ключи́цу** умрау һөйәген һындырыу

**КЛЮЧИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое умрау ...ы, умрау һөйәге...ы; **ключи́чная впа́дина** умрау соҡоро

**КЛЮ́ШКА** *ж* сәкән; **уда́рить клю́шкой** сәкән менән һуғыу

**КЛЯ́КСА** *ж* тап, ҡара; **посади́ть кля́ксу** ҡара тамыҙыу

**КЛЯ́НЧИТЬ** *несов., что* и *без доп.*; *прост.* һораныу, теләнеү, инәлеү, ялбарыу; **кля́нчить де́ньги** ялбарып, аҡса һорау

**КЛЯП** *м* келәп; **засу́нуть в рот кляп** ауыҙға келәп тығыу

**КЛЯ́ССЕР** *м* кляссер, марка альбомы

**КЛЯСТЬ** *несов. кого-что* ләғнәтләү, ҡәһәрләү, ҡарғау

**КЛЯ́СТЬСЯ** *несов. в чём, чем* и *с неопр.* ант итеү, һүҙ биреү; **кля́сться в ве́рности** тоғро булырға ант итеү; **кля́сться свое́й голово́й** *в чём-л.* үҙенең башы менән ант итеү; **он кля́лся бо́льше не опа́здывать** ул башҡа һуңламаҫҡа һүҙ бирҙе

**КЛЯ́ТВА** *ж* ант; **нару́шить кля́тву** ант боҙоу; **дать кля́тву** ант биреү; **сдержа́ть кля́тву** антты тотоу

**КЛЯ́ТВЕННЫЙ,** -ая, -ое антлы, ант ителгән; **кля́твенное обеща́ние** ант ителгән вәғәҙә

**КЛЯТВОПРЕСТУПЛЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* ант(ты) боҙоу, антҡа хыянат итеү

**КЛЯТВОПРЕСТУ́ПНИК** *м*; *книжн.* ант боҙоусы, антҡа хыянат итеүсе

**КЛЯ́УЗА** *ж*; *разг.* ошаҡ; **занима́ться кля́узами** ошаҡ йөрөтөү

**КЛЯ́УЗНИК** *м* и **КЛЯ́УЗНИЦА** *ж*; *разг., пренебр.* ошаҡсы; **он не кля́узник** ул ошаҡсы түгел

**КЛЯ́УЗНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ошаҡлашыу; **кля́узничать нача́льству** башлыҡтарға (етәкселәргә) ошаҡлашыу

**КЛЯ́УЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** ошаҡ менән бәйле; **кля́узный проце́сс** ошаҡ менән бәйле процесс **2.** ошаҡсыл; **кля́узный челове́к** ошаҡсыл кеше

**КЛЯ́ЧА** *ж* яшыҡ (арыҡ) ат; **на тако́й кля́че далеко́ не пое́дешь** бындай арыҡ ат менән алыҫ китә алмаҫһың

**КНЕ́ЛИ** *мн.* кнели (*ит, балыҡ фаршынан яһалған сумар*)

**КНИ́ГА** *ж* **1.** китап; **то́лстая кни́га** ҡалын китап; **кни́га большо́го форма́та** ҙур форматлы китап; **чита́ть кни́гу** китап уҡыу; **пе́рвая кни́га рома́на "Кинзя́"** "Кинйә" романының беренсе китабы **2.** кенәгә; **бухга́лтерская кни́га** бухгалтерия кенәгәһе; **жа́лобная кни́га** шикәйәт (ялыу) кенәгәһе ♦ **букинисти́ческая кни́га** букинистик китап; **гла́вная кни́га** *бухг.* керем-сығым кенәгәһе; **домова́я кни́га** йорт кенәгәһе; **Кни́га почёта** Хөрмәт кенәгәһе; **кни́га за семью́ печа́тями** *книжн.* аңлашылып етмәгән (төшөнөүе ауыр) нәмә

**КНИГОВЕ́Д** *м* китап эше белгесе, китап тикшереүсе

**КНИГОВЕ́ДЕНИЕ** *с* китап тураһында фән

**КНИГОЕ́Д** *м* ҡағыҙ бете

**КНИГОИЗДА́ТЕЛЬ** *м* китап нәшриәте хужаһы, китап баҫтырыусы, нәшир

**КНИГОИЗДА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое китап нәшер итеү (баҫтырыу) ...ы; **книгоизда́тельское де́ло** китап нәшер итеү эше

**КНИГОИЗДА́ТЕЛЬСТВО** *с* китап нәшриәте; **книгоизда́тельство "Зна́ние"** "Белем" китап нәшриәте

**КНИГОЛЮ́Б** *м* китап һөйөүсе

**КНИГОНО́ША** *м* и *ж* **1.** (*распространитель книг*) китап таратыусы **2.** (*продавец*) китап һатып йөрөүсе

**КНИГОПЕЧА́ТАНИЕ** *с* китап баҫыу (баҫтырыу)

**КНИГОПЕЧА́ТНЫЙ,** -ая, -ое китап баҫыу ...ы; **книгопеча́тный стано́к** китап баҫыу станогы

**КНИГОТОРГО́ВЛЯ** *ж* китап сауҙаһы; **се́льская книготорго́вля** ауылдағы китап сауҙаһы

**КНИГОТОРГО́ВЫЙ,** -ая, -ое китап сауҙаһы ...ы; **книготорго́вые организа́ции** китап сауҙаһы ойошмалары

**КНИГОХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* **1.** китап һаҡлау бинаһы **2.** ҙур китапхана

**КНИ́ЖКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **кни́га** **2.** кенәгә; **зачётная кни́жка** һынау (имтихан) кенәгәһе; **трудова́я кни́жка** хеҙмәт кенәгәһе **3.** *анат.* (*часть желудка у жвачных животных*) ҡатланһыҡ ♦ **сберега́тельная кни́жка** һаҡлыҡ кенәгәһе

**КНИ́ЖНИК** *м*; *разг.* **1.** (*любитель*) китап һөйәҫкәре; **прослы́ть кни́жником** китап һөйәҫкәре булып танылыу **2.** (*работник*) китап сауҙаһы хеҙмәткәре

**КНИ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** китап ...ы; **кни́жный переплёт** китап тышы; **кни́жный шкаф** китап (кәштәһе) шкафы; **кни́жный магази́н** китап магазины **2.** китаптан алынған, китапса, практиканан айырылған, тик китапса ғына йәшәгән; **кни́жные зна́ния** китаптан алынған белем; **кни́жный челове́к** практиканан айырылған (тик китапса ғына йәшәгән) кеше **3.** китапса, китапҡа хас; **кни́жные оборо́ты** китапҡа хас әйтелеш

**КНИ́ЗУ** *нареч.* аҫҡа, түбәнгә, аҫҡа (түбәнгә) табан; **опусти́ть го́лову кни́зу** башты түбән эйеү; **кни́зу руче́й стано́вится многово́днее** түбәнгә табан шишмә ҙурая

**КНО́ПКА** *ж* **1.** ҡаҙауыс; **коро́бка кно́пок** бер ҡап ҡаҙауыс; **приколо́ть кно́пкой** ҡаҙауыс менән ҡаҙап ҡуйыу **2.** (*для одежды*) сыртлаҡ; **кно́пки на перча́тках** бирсәткә сыртлаҡтары; **расстегну́ть кно́пки ко́фточки** кофтаның сыртлаҡтарын ысҡындырыу **3.** төймә; **кно́пка электри́ческого звонка́** электр ҡыңғырауының төймәһе ♦ **нажа́ть (на все) кно́пки** бөтә көстө һалыу

**КНУТ** *м* сыбыртҡы; **кнут из ремня́** ҡайыш сыбыртҡы; **погоня́ть кнуто́м** сыбыртҡылап ҡыуыу

**КНУТОВИ́ЩЕ** *с* сыбыртҡы (ҡамсы) һабы; **кнут с дли́нным кнутови́щем** оҙон һаплы сыбыртҡы; **стуча́ть кнутови́щем** ҡамсы һабы менән шаҡылдау

**КНЯГИ́НЯ** *ж* кенәз ҡатыны

**КНЯЖЕНИ́КА** *ж* **1.** бикә үләне **2.** *собир.* бикә үләне емеше

**КНЯ́ЖЕСКИЙ,** -ая, -ое кенәз ...ы, кенәзлек ...ы; **кня́жеский дом** кенәз йорто; **кня́жеский род** кенәз нәҫеле; **кня́жеский ти́тул** кенәзлек титулы

**КНЯ́ЖЕСТВО** *с* кенәзлек; **уде́льное кня́жество** удел кенәзлеге

**КНЯ́ЖИТЬ** *несов.* кенәзлек итеү

**КНЯЖНА́** *ж* кенәз ҡыҙы

**КНЯЗЬ** *м* кенәз

**КО** *предлог см.* **к**; **ко всем** барыһына ла

**КОАЛИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое коалиция ...ы, коалицион; **коалицио́нный догово́р** коалиция килешеүе; **коалицио́нное прави́тельство** коалиция хөкүмәте

**КОАЛИ́ЦИЯ** *ж* коалиция (*уртаҡ маҡсатҡа ирешеү өсөн дәүләттәрҙең, сәйәси фирҡәләрҙең үҙ-ара килешеүе*)

**КО́БАЛЬТ** *м* кобальт (**1.** *химик элемент, көмөш төҫөндәге металл* **2.** *ҡуйы күк буяу*)

**КО́БАЛЬТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** кобальт ...ы; **ко́бальтовый цвет** кобальт төҫө **2.** кобальтлы; **ко́бальтовая руда́** кобальтлы мәғдән; **ко́бальтовая кра́ска** кобальтлы буяу

**КОБЕ́ЛЬ** *м* арлан эт

**КО́БЗА** и **КОБЗА́** *ж*; *муз.* кобза (*украин думбыраһы*)

**КОБЗА́РЬ** *м* кобзарсы (*кобзала уйнап, йыр башҡарыусы*)

**КО́БРА** *ж* кобра, күҙлекле йылан

**КОБУРА́** *ж* кобура (*пистолет йәки револьвер ҡабы*)

**КО́БЧИК** *м* мүктәрге (*бөркөттәр ғаиләһенә ҡараған йыртҡыс ҡош*)

**КОБЫ́З, КО́БЫЗ** и *обл.* **КУБЫ́З** *м*; *муз.* ҡумыҙ; **деревя́нный кобы́з** ағас ҡумыҙ; **язычо́к кобы́за** ҡумыҙ теле; **игра́ть на кобы́зе** ҡумыҙ уйнау

**КОБЫ́ЛА** *ж* **1.** бейә; (*двух-, трёхлетнего возраста*) ҡонажын; (*трёх-, четырёхлетнего возраста*) дүнәжен; (*со времени половой зрелости до первой жерёбости*) байтал **2.** *груб., прост.* (*о рослой женщине*) һыйыр

**КОБЫ́ЛИЙ,** -ья, -ье бейә ...ы; **кобы́лье молоко́** бейә һөтө

**КОБЫЛИ́ЦА** *ж см.* **кобы́ла** 1

**КОБЫ́ЛКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **кобы́ла** 1; **2.** *муз.* тейәк (*музыка ҡоралдарында ҡыл аҫтына ҡуйылған таҡта киҫәге*) **3.** *зоол.* сиңерткә

**КО́ВАНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сүкелгән, сүкеп яһалған; **ко́ваный гвоздь** сүкеп яһалған сөй; **ко́ваный меч** сүкеп яһалған ҡылыс **2.** ҡалай менән көпләнгән; **ко́ваный сунду́к** ҡалай менән көпләнгән һандыҡ; **ко́ваная дверь** ҡалай менән көпләнгән ишек **3.** дағаланған; **ко́ваная ло́шадь** дағаланған ат **4.** *перен.* сарланған, ҡойоп ҡуйылған; **ко́ваный стих** ҡойоп ҡуйылған шиғыр

**КОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое мәкерле, яуыз уйлы, аҫтыртын уҫал; **кова́рный враг** мәкерле дошман; **кова́рная улы́бка** мәкерле йылмайыу; **кова́рная боле́знь** мәкерле ауырыу; **кова́рный посту́пок** аҫтыртын уҫал эш-ҡылыҡ

**КОВА́РСТВО** *с* мәкер (яуыз) уй, аҫтыртын этлек; **челове́к, по́лный кова́рства** эсе мәкер уй менән тулған кеше; **он не ожида́л тако́го кова́рства** ул бындай мәкерҙе (яуызлыҡты) көтмәгәйне

**КОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* сүкеү, сүкеп яһау; **кова́ть желе́зо** тимер сүкеү; **кова́ть ору́жие** ҡорал сүкеп яһау **2.** *кого-что* дағалау; **кова́ть коня́** ат дағалау **3.** *что*; *перен.* барлыҡҡа килтереү, тыуҙырыу, хәл итеү, яулау; **кова́ть побе́ду** еңеүҙе яулау; **кова́ть свою́ судьбу́** үҙ яҙмышыңды үҙең хәл итеү ♦ **куй желе́зо, пока́ горячо́** тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ

**КОВБО́Й** *м* ковбой (*Төньяҡ Америкала һыбай көтөүсе*)

**КОВБО́ЙКА** *ж*; *разг.* ковбойка (*шаҡмаҡлы ирҙәр күлдәге*)

**КОВБО́ЙСКИЙ,** -ая, -ое ковбой ...ы; **ковбо́йская шля́па** ковбой эшләпәһе; **ковбо́йская руба́шка** ковбой күлдәге

**КОВЁР** *м* **1.** келәм, көйөҙ; **мя́гкий ковёр** йомшаҡ келәм; **пове́сить ковёр** келәм элеп ҡуйыу; **тка́ный узо́р на ковре́** *этн.* келәмдәге биҙәк (аҫа) **2.** *перен.* япма, юрған; **сне́жный ковёр** ҡар япмаһы

**КОВЕ́РКАТЬ** *несов. кого-что*; *в разн. знач.* боҙоу; **кове́ркать игру́шку** уйынсыҡ(ты) боҙоу; **кове́ркать ребёнка дурны́м воспита́нием** насар тәрбиә менән баланы боҙоу; **кове́ркать слова́** һүҙҙәрҙе боҙоу; **кове́ркать чужу́ю мысль** кеше фекерен боҙоу

**КОВЕРКО́Т** *м* коверкот (*беше йөн туҡыма*); **пальто́ из коверко́та** коверкоттан тегелгән пальто

**КОВЕРКО́ТОВЫЙ,** -ая, -ое коверкот; **коверко́товый костю́м** коверкот костюм

**КО́ВКА** *ж см.* **кова́ть** 1, 2; **ко́вка ста́ли** ҡорос сүкеү; **ко́вка ло́шади** ат дағалау

**КО́ВКИЙ,** -ая, -ое сүкелеүсән, еңел сүкелә торған; **ко́вкий мета́лл** еңел сүкелеүсән металл

**КО́ВКОСТЬ** *ж* сүкелеүсәнлек; **желе́зо облада́ет высо́кой ко́вкостью** тимергә сүкелеүсәнлек хас, тимер яҡшы сүкелә

**КОВРИ́ГА** *ж* бөтөн икмәк

**КОВРИ́ЖКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **коври́га** **2.** коврижка (*перәник төрө*); **медо́вые коври́жки** баллы коврижкалар ♦ **ни за каки́е коври́жки** алтын бирһәң дә булмай

**КОВРО́ВЩИК** *м* и **КОВРО́ВЩИЦА** *ж* келәм туҡыусы

**КОВРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** келәм ...ы; **ковро́вое произво́дство** келәм етештереү **2.** (*обитый, покрытый ковром*) келәмле, келәм ябылған; **ковро́вые са́ни** келәм ябылған сана **3.** келәм кеүек, өбөрөләп һуғылған; **ковро́вая ткань** келәм кеүек (өбөрөлө, өбөрөләп һуғылған) туҡыма; **ковро́вая ска́терть** өбөрөләп һуғылған ашъяулыҡ

**КОВЧЕ́Г** *м* **1.** *миф.* Нух кәмәһе **2.** *уст.* һандыҡ

**КОВШ** *м* **1.** сүмес, ижау; **зачерпну́ть ковшо́м воды́** сүмес менән һыу һоҫоп алыу **2.** *тех.* сүмес; **ковш экскава́тора** экскаватор сүмесе; **лите́йный ковш** ҡойоу сүмесе

**КОВЫ́ЛЬ** *м* ҡылған

**КОВЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡылған ...ы; **ковы́льное се́мя** ҡылған орлоғо **2.** ҡылғанлы; **ковы́льная степь** ҡылғанлы дала

**КОВЫЛЯ́ТЬ** *несов.*; *разг.* аҡһаҡлау, сатанлау, туйтаңлау, тәнтерәкләү; **ходи́ть ковыля́я** тәнтерәкләп йөрөү

**КОВЫРЯ́ТЬ** *несов. что*, *в чём*; *разг.* соҡоу, ҡаҙыу; **ковыря́ть в зуба́х** теш соҡоу; **ковыря́ть зе́млю** ер соҡоу

**КОВЫРЯ́ТЬСЯ** *несов. в чём*; *разг.* соҡоноу, ҡаҙыныу; **ковыря́ться в песке́** ҡомда соҡоноу

**КОГДА́ I** *нареч.* **1.** ҡасан; **ты когда́ придёшь?** һин ҡасан киләһең?; **когда́ начина́ется собра́ние?** йыйылыш ҡасан башлана?; **неизве́стно когда́** ҡасан икәне билдәһеҙ; **вот когда́ я узна́л его́** бына ҡасан мин уны таныным **2.** ҡасан, -ған/-гән; **я не зна́ю, когда́ он придёт** мин уның ҡасан килгәнен (килерен) белмәйем; **когда́ пришла́ весть о побе́де** еңеү хәбәре килгәндә

**КОГДА́ II** *союз* **1.** *временной* (*употребляется в начале придаточного предложения времени*): а) (*для обозначения одновременности действия главного и придаточного предложений*) -ғас/-гәс; **отдохнём, когда́ зако́нчим рабо́ту** эште бөтөргәс, ял итербеҙ; б) (*для обозначения одновременности действия*) -ған/-гән саҡта; **я просну́лся, когда́ бы́ло темно́** мин ҡараңғы төшкән саҡта уяндым

**2.** *условн.* (*употребляется в начале условного предложения в значении “если”*) ҡасан, шунда; **пусть придёт, когда́ захо́чет** ҡасан теләй, шунда килһен

**3.** *изъяснит.* (*присоединяет придаточные предложения дополнительные*) ҡасан, ҡайһы ваҡытта; **я не зна́ю, когда́ он придёт** уның ҡасан килерен мин белмәйем

**КОГДА́-НИБУДЬ** и **КОГДА́-ЛИБО** *нареч.* ҡасан да булһа, ҡасан булһа ла, берәй ваҡыт; **ви́дели ли вы его́ когда́-нибудь?** һеҙ уны берәй ваҡыт күргәнегеҙ бармы?; **когда́-нибудь да придёт** ҡасан да булһа бер килер әле

**КОГДА́-ТО** *нареч.* **1.** (*некогда в прошлом*) бер ваҡыт, ҡасандыр; **когда́-то там бы́ло мо́ре** ҡасандыр унда (ул урында) диңгеҙ булған; **когда́-то мы бы́ли знако́мы** ҡасандыр беҙ таныш инек **2.** (*неизвестно когда в будущем*) ҡасан, берәй ваҡыт; **когда́-то он ещё придёт** берәй ваҡыт ул тағы килер әле

**КОГО́РТА** *ж* когорта (**1.** *Боронғо Римда йәйәүле ғәскәр отряды* **2.** *күсм. берҙәм тупланған кешеләр төркөмө*)

**КО́ГОТЬ** *м* тырнаҡ; **медве́жьи ко́гти** айыу тырнаҡтары; **орли́ные ко́гти** бөркөт тырнаҡтары ♦ **облома́ть ко́гти** *кому* тырнаҡтарын һындырыу, ҡаяуын ҡайырыу; **показа́ть (свои́) ко́гти** хаслығын белдереү, усал ниәтен белдереү; **попа́сть в ко́гти** *к кому* тырнағына эләгеү; **быть в когтя́х** *у кого берәүҙең* тырнағына эләгеү; **держа́ть в когтя́х** *кого* ҡулдан ысҡындырмау, бәйҙә тотоу

**КОГТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое үткер тырнаҡлы, тырнаҡлы; **когти́стые ла́пы медве́дя** айыуҙың үткер тырнаҡлы тәпәйе

**КОГТИ́ТЬ** *несов. кого-что* тырнаҡ ҡаҙау, тырнаҡ батырыу; **я́стреб когти́т же́ртву** ҡарсыға ҡорбанына тырнаҡ ҡаҙай

**КОД** *м* код (*шартлы билдәләр системаһы*); **телегра́фный код** телеграф коды; **междунаро́дный морско́й код** халыҡ-ара диңгеҙ коды; **сигна́льный код** сигнал коды

**КОДЕ́ИН** *м*; *фарм*. кодеин (*йүтәлдән ҡулланылған дарыу*)

**КО́ДЕКС** *м*; *в разн. знач*. кодекс; **гражда́нский ко́декс** гражданлыҡ кодексы; **уголо́вный ко́декс** енәйәт кодексы; **ко́декс зако́нов о труде́** хеҙмәт тураһында закондар кодексы; **перга́ментный ко́декс** пергамент кодексы; **мора́льный ко́декс** әхлаҡ кодексы

**КОДИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов. что*; *спец*. кодлау, кодҡа һалыу; **коди́ровать информа́цию** информацияны (мәғлүмәтте) кодлау

**КОДИРО́ВКА** *ж* кодлау, кодҡа һалыу; **кодиро́вка информа́ции** информацияны кодлау

**КОДИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *юр*. кодификация (*билдәле бер хоҡуҡ өлкәһе закондарын яңынан ҡарап, бер тәртипкә һалыу*)

**КОДИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов*., *несов. что*; *юр*. кодификациялау, кодексҡа туплау

**КО́ДОВЫЙ,** -ая, -ое код ...ы; **ко́довые зна́ки** код билдәләре

**КО́Е-ГДЕ́** и *разг*. **КОЙ-ГДЕ́** *нареч*. ҡайһы бер ерҙә (урында), ара-тирә, урыны-урыны менән; **ко́е-где́ начина́ет пробива́ться молода́я трава́** ҡайһы бер ерҙә йәш үлән сыға башланы; **я́года ко́е-где́ созрева́ет** еләк ара-тирә бешә башланы

**КО́Е-КА́К** и *разг*. **КОЙ-КА́К** *нареч*. **1.** (*с большим трудом*, *еле-еле*) саҡ-саҡ, көскә-көскә, көс-хәл менән; **ко́е-ка́к добра́ться до до́му** көскә-көскә өйгә ҡайтып етеү **2.** (*плохо*, *небрежно*) арлы-бирле, өҫтән-мөҫтән, илке-һалҡы; **де́лать ко́е-ка́к** арлы-бирле эшләү; **рабо́тать ко́е-ка́к** илке-һалҡы (өҫтән-мөҫтән) эшләү

**КО́Е-КАКО́Й** и *разг*. **КОЙ-КАКО́Й** *мест*. **1.** (некоторый) ҡайһы бер; **привести́ ко́е-каки́е приме́ры в выступле́нии** сығышта ҡайһы бер миҫалдар килтереү **2.** (*неважный*, *незначительный*) әҙ-мәҙ, ваҡ-төйәк, бер аҙ, бер ни ҡәҙәр; **завели́сь ко́е-каки́е деньжо́нки** ҡулға бер ни ҡәҙәр аҡса инде

**КО́Е-КОГДА́** и *разг*. **КОЙ-КОГДА́** *нареч*. ҡайһы саҡта, ара-тирә; **ко́е-когда́ он захо́дит** ҡайһы саҡта ул ингеләй

**КО́Е-КТО́** и *разг*. **КОЙ-КТО́** *мест*. (*некоторые люди*) ҡайһы (бәғзе) берәүҙәр; **ко́е-кто́ уже́ зако́нчил рабо́ту** ҡайһы берәүҙәр эшен бөтөргән; **я ко́е-кого́ из вас зна́ю** мин бәғзе берәүегеҙҙе беләм; **е́ду ко́е с ке́м повида́ться** бер кеше менән осрашырға китеп барам

**КО́Е-КУДА́** и *разг*. **КОЙ-КУДА́** *нареч*. (ҡайһы) бер урынға, (ҡайһы) бер ергә; **мне на́до ещё ко́е-куда́ зайти́** миңә бер ергә кереп сығырға кәрәк

**КО́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** койка ...ы; **ко́ечная се́тка** койка селтәре **2.** *разг*. ятып дауаланыу ...ы; **ко́ечный режи́м** ятып дауаланыу режимы; **ко́ечный больно́й** ятып дауаланыусы

**КО́Е-ЧТО́** и *разг*. **КОЙ-ЧТО́** *мест*. (*нечто*, *немногое*) ҡайһы бер нәмә, нимәлер; **поговори́ть ко́е о чём** ҡайһы бер нәмә тураһында һөйләшеп алыу; **сказа́ть ко́е-что́** нимәлер әйтеү

**КО́ЖА** *ж* **1.** (*человека*, *животного*) тире; (*змеи*) ҡау; **сса́дины на ко́же** тиренең сыйылған урындары; **ко́жа змеи́** йылан ҡауы **2.** (*выделанная шкура*) күн; **чемода́н из иску́сственной ко́жи** яһалма күндән эшләнгән сумаҙан **3.** (*кожура*) ҡабыҡ, тыш; **апельси́н с то́лстой ко́жей** ҡалын ҡабыҡлы әфлисун ♦ **гуси́ная ко́жа** ҡаҙ тән, бала йөн ҡабарыу (*өшөгән саҡта*); **ко́жа да ко́сти** ҡоро һөйәк; **из ко́жи (вон) лезть** тиреһенән сығырҙай булып тырышыу, ярылырҙай булып тырышыу; **моро́з по ко́же подира́ет** тән сымырлап китеү, баштан һыуыҡ һыу ҡойғандай булыу

**КО́ЖАНКА** *ж*; *разг*. кәжән, күн пальто (куртка); **оде́т в ко́жанку** кәжән кейгән

**КО́ЖАНЫЙ,** -ая, -ое күн; **ко́жаная о́бувь** күн аяҡ кейеме; **ко́жаный дива́н** күн диван

**КОЖЕ́ВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** күн ...ы; **коже́венный заво́д** күн заводы **2.** күн, күндән булған; **коже́венный това́р** күн тауар

**КОЖЕ́ВНИК** *м* тире иләүсе

**КОЖИМИ́Т** *м* кожимит (*яһалма күн*)

**КОЖИМИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое кожимит (*яһалма күндән эшләнгән*); **кожими́товые подмётки** кожимит олтан

**КО́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое ҡалын (тығыҙ) тиреле (*фил тураһында*); ҡалын (тығыҙ) ҡабыҡлы (*картуф*, *ҡарбуз тураһында*)

**КО́ЖИЦА** *ж* **1.** *разг*. йоҡа тире; **ко́жица лица́** биттең йоҡа тиреһе **2.** ҡабыҡ, яры, тиресә; **очища́ть ко́жицу** ҡабығынан таҙартыу; **ко́жица листа́** япраҡ тиресәһе

**КО́ЖНИК** *м*; *разг*. тире ауырыуҙары табибы (врачы)

**КО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое тире ...ы; **ко́жные боле́зни** тире ауырыуҙары

**КОЖУРА́** *ж* ҡабыҡ; **кожура́ мандари́на** мандарин ҡабығы

**КО́ЖУХ** *м* **1.** (*тулуп*) толоп, тиртун; **овчи́нный ко́жух** һарыҡ тиреһенән тегелгән толоп **2.** *тех*. ҡаплама; **желе́зный ко́жух мото́ра** моторҙың тимер ҡапламаһы

**КОЗА́** *ж* кәзә; **дома́шняя коза́** йорт кәзәһе; **ди́кая коза́** ҡыр кәзәһе ♦ **драть (лупи́ть) как си́дорову ко́зу** бер ҡат тиреһен тунау, һырт ҡайышын алыу, ҡабырғаһын һанау; **на козе́ не объе́дешь** *кого* тишек шүмәнгә ултырта алмаҫһың; **на козе́ не подъе́дешь** килешә (һөйләшә) алмаҫһың (*кире әҙәмгә ҡарата*)

**КОЗЁЛ** *м* **1.** кәзә тәкәһе; **ста́рый козёл** ҡарт кәзә тәкәһе; **племенно́й козёл** нәҫел тәкәһе **2.** *спорт*. кәзә (*гимнастик күнекмәләр өсөн*

*ҡоролма*); **прыга́ть че́рез козла́** кәзә аша һикереү ♦ **козёл отпуще́ния** ғәйепһеҙҙән ғәйепле; **драть козла́** *прост.* йәмһеҙ тауыш менән йырлау; **заби́ть козла́** *см.* **заби́ть**; **пусти́ть козла́ в огоро́д** кәзәне кәбеҫтә баҡсаһына индереү; **как от козла́ молока́**; **как от козла́ — ни ше́рсти, ни молока́** бер ниндәй файҙаһы юҡ

**КОЗЕРО́Г** *м* **1.** *зоол.* тау кәзәһе **2.** *астр.* Кәзәмөгөҙ, Ылаҡ (*йондоҙлоҡ*)

**КО́ЗИЙ,** -ья, -ье кәзә ...ы; **ко́зье молоко́** кәзә һөтө; **ко́зий пух** кәзә мамығы ♦ **ко́зья но́жка** кәзә тояғы (*кулдан махсус төрөлгән тәмәке*)

**КОЗЛЁНОК** *м* кәзә бәрәсе

**КОЗЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** кәзә тиреһенән (күненән) ...ы; **козли́ная доха́** кәзә тиреһенән ике яҡлы тун **2.** кәзә, кәзәнеке һымаҡ (кеүек); **козли́ная боро́дка** кәзә һаҡал; **стари́к с козли́ным го́лосом** кәзә тауышлы ҡарт

**КОЗЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое кузлауай; **козло́вые сапоги́** кузлауай итек

**КО́ЗЛЫ** *только мн.*; *в разн. знач.* кузла; **он вскочи́л на ко́злы и погна́л лошаде́й** ул кузлаға һикереп менде лә аттарҙы ҡыуалай башланы; **пили́ть дрова́ на ко́злах** кузлаға һалып, утын бысыу

**КОЗЛЯ́ТИНА** *ж* кәзә ите

**КО́ЗНИ** *обычно мн.* хөсөтлөк, яуыз уй, (аҫтыртын) этлек; **стро́ить ко́зни** аҫтыртын этлек эшләү

**КОЗОДО́Й** *м* төн күгәрсене

**КОЗЫРЁК** *м* козырёк; **козырёк фура́жки** фуражка козырёгы; **воро́та с резны́м козырько́м** селтәрләп эшләнгән козырёклы ҡапҡа ♦ **взять (брать) под козырёк**; **сде́лать под козырёк** честь биреү, хәрбиҙәрсә сәләмләү

**КОЗЫРНО́Й** и **КОЗЫ́РНЫЙ,** -ая, -ое уйын; **козырна́я ка́рта** уйын кәрт; **козы́рный туз** уйын туз

**КОЗЫРНУ́ТЬ I** *сов. см.* **козыря́ть** I

**КОЗЫРНУ́ТЬ II** *сов. см.* **козыря́ть** II

**КО́ЗЫРЬ** *м* **1.** *карт.* уйын кәрт; **ходи́ть с ко́зыря** уйын кәрт менән йөрөү **2.** өҫтөнлөк; **большо́й ко́зырь** ҙур өҫтөнлөк

**КОЗЫРЯ́ТЬ I** *несов.*; *разг.* **1.** уйын кәрттән йөрөү, уйындан йөрөү **2.** *чем*; *перен.* ҡупрайыу, маҡтаныу, маһайыу; **козыря́ть свои́м знако́мством** *с кем-л.* танышлыҡ менән маҡтаныу

**КОЗЫРЯ́ТЬ II** *несов.*; *разг.* хәрбиҙәрсә сәләмләү (сәләм биреү)

**КОЗЯ́ВКА** *ж*; *разг.* ваҡ бөжәк (ҡорт); **лови́ть в траве́ козя́вок** үлән араһынан ваҡ бөжәк сүпләү

**КОЙ: ни в ко́ем слу́чае** һис ҡасан, бер ваҡытта ла

**КОЙ-ГДЕ́** *нареч. см.* **ко́е-где́**

**КО́ЙКА** *ж* койка; **лежа́ть на ко́йке** койкала ятыу; **больни́ца на пятьдеся́т ко́ек** илле койкалы хәстәхана

**КОЙ-КА́К** *нареч. см.* **ко́е-ка́к**

**КОЙ-КАКО́Й** *мест. см.* **ко́е-како́й**

**КОЙ-КОГДА́** *нареч. см.* **ко́е-когда́**

**КОЙ-КТО́** *мест. см.* **ко́е-кто́**

**КОЙ-КУДА́** *нареч. см.* **ко́е-куда́**

**КОЙНЕ́** *с нескл.*; *лингв.* койне (**1.** *Боронғо Грецияла дөйөм халыҡ теле* **2.** *ырыу-ара йәки диалект-ара дөйөм тел*)

**КОЙО́Т** *м* койот (*Төньяҡ Америка бүреһе*)

**КОЙ-ЧТО́** *мест. см.* **ко́е-что́**

**КОК I** *м* кок (*күпертелгән маңлай сәсе*)

**КОК II** *м* кок (*карап ашнаҡсыһы*)

**КО́КА** *ж* кока (*япраҡтарынан кокаин алына торған тропик ҡыуаҡ*)

**КОКАИ́Н** *м* кокаин (*кока япрағынан алынған наркотик матдә*)

**КОКАИНИ́ЗМ** *м* кокаинсылыҡ (*кокаинды йыш ҡулланыуға бирелеп китеү*)

**КОКАИНИ́СТ** *м* кокаинсы (*кокаин ҡулланыусы*)

**КОКАИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое кокаин ...ы; **кокаи́новый нарко́з** кокаин наркозы

**КО́КА-КО́ЛА** *ж* кока-кола (*алкоголһеҙ эсемлек*)

**КОКА́РДА** *ж* кокарда (*фуражка тирәсенә ҡаҙай торған форма билгеһе*)

**КОКЕ́ТКА** *ж* **1.** ҡылансыҡ, ҡыйпысыҡ, ҡыйпанлаҡ ҡатын-ҡыҙ **2.** *портн.* кокетка, күкрәк бөрмәһе

**КОКЕ́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡылансыҡ, ҡыйпысыҡ, ҡыйпанлаҡ; **коке́тливая де́вочка** ҡыйпанлаҡ ҡыҙ **2.** (*нарядный, привлекательный*) ҡупшы, матур, яғымлы; **коке́тливое пла́тье** ҡупшы күлдәк

**КОКЕ́ТНИЧАТЬ** *несов.* **1.** *с кем* и *без доп.* ҡылансыҡланыу, ҡыйпысыҡланыу, ҡыйпаңлау, ҡыйшаңлау; **коке́тничать с мужчи́нами** ирҙәр алдында ҡыйпаңлау **2.** *чем*; *перен.* булып ҡыланыу (күренергә тырышыу); **коке́тничать скро́мностью** баҫалҡы булып ҡыланыу

**КОКЕ́ТСТВО** *с* ҡыланыу, ҡыйпысыҡлыҡ, ҡылансыҡлыҡ; **в ней не́ было и те́ни коке́тства** унда ҡыланыуҙың эҙе (әҫәре) лә юҡ ине

**КО́ККИ** *мн.* (*ед.* **кокк** *м*) *мед.* кокк (*шар һымаҡ бактериялар*)

**КОКЛЮ́Ш** *м*; *мед.* сәсәтмә, быума йүтәл

**КОКЛЮ́ШКА** *ж* селтәр энәһе; **вяза́ть коклю́шками** селтәр энәһе менән бәйләү

**КОКЛЮ́ШНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәсәтмә ...ы; **коклю́шный ка́шель** сәсәтмә йүтәл **2.** сәсәтмә ауырыулы; **коклю́шный ребёнок** сәсәтмә ауырыулы бала

**КО́КОН** *м* ҡуҙы, ҡорт йомғағы; **шелкови́чный ко́кон** ебәк ҡорто йомғағы, ебәк ҡортоноң ҡурсаҡ көбө

**КО́КОННЫЙ,** -ая, -ое ҡуҙы ...ы, ҡорт йомғағы ...ы; **ко́конная нить** ҡуҙы ебе

**КОКО́С** *м* кокос (*кокос пальмаһы һәм уның емеше*)

**КОКО́СОВЫЙ,** -ая, -ое кокос ...ы; **коко́совая скорлупа́** кокос ҡабығы; **коко́совый оре́х** кокос сәтләүеге; **коко́совое ма́сло** кокос майы

**КОКО́ШНИК** *м* кокошник (1. *мәрйәләрҙең боронғо баш кейеме* 2. *архит. биналарҙың фасадында ярым түңәрәк кеҫек биҙәк*)

**КОКС** *м* кокс (*үртәп әҙерләнгән таш күмер йәки торф*)

**КОКСО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "кокс" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **коксокомбина́т** кокс комбинаты

**КОКСОВА́НИЕ** *с*; *тех. см.* **коксова́ть**

**КОКСОВА́ТЬ** *несов. что*; *тех.* кокслау; **коксова́ть у́голь** таш күмерҙе кокслау

**КО́КСОВЫЙ,** -ая, -ое кокс ...ы; **ко́ксовый газ** кокс газы

**КОКСОХИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое кокс химияһы ...ы; **коксохими́ческое произво́дство** кокс химияһы сәнәғәте

**КОКСОХИ́МИЯ** *ж* кокс химияһы

**КОКСУ́ЮЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся *тех.* кокслана торған, кокслаyусан; **коксу́ющийся у́голь** коксланыусан (кокслана торған) күмер

**КОКТЕ́ЙЛЬ** *м* коктейль; **моло́чный builder коктейль** һөт коктейле

**КОЛ** *м* 1. (*мн.* **ко́лья**) ҡаҙыҡ; **вбить кол** ҡаҙыҡ ҡағыу 2. (*мн.* **колы́**) *разг.* берле, берле билдәһе; **поста́вить ученику́ кол в дневни́к** уҡыусының көндәлегенә берле ҡуйыу ♦ **ни кола́ ни двора́** *у кого* бер нәмәһеҙ; ауыҙын аса, үпкәһе күренә; һыйыр мөгөҙөнә элерлек тә нәмәһе юҡ; **коло́м стоя́ть** ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай тороу; **коло́м стоя́ть в го́рле** тамаҡҡа тороу, тамаҡтан үтмәү; **хоть кол на голове́ теши́** *кому*; *прост.* мейеһенә ярып һалһаң да булмай

**КО́ЛБА** *ж* колба

**КОЛБАСА́** *ж* колбаса, тултырма; **варёная колбаса́** бешерелгән тултырма; **копчёная колбаса́** ыҫлаған (ҡаҡланған) тултырма ♦ **кати́сь колбасо́й** ыҫҡын, үксәңде күтәр

**КОЛБА́СНЫЙ,** -ая, -ое колбаса ...ы, тултырма ...ы; **колба́сные изде́лия** тултырма ашамлыҡтары

**КОЛГО́ТКИ** *только мн.* колготка

**КОЛДОВА́ТЬ** *несов.* 1. сихырсылыҡ итеү, сихырлау 2. *над кем-чем* и *без доп.*; *перен., шутл.* маташыу, булышыу

**КОЛДОВСКО́Й,** -ая, -ое 1. сихыр ...ы, сихырсылыҡ ...ы; **колдовско́е иску́сство** сихырсылыҡ оҫталығы; **колдовско́е заклина́ние** сихыр эпсене; **колдовско́й цвето́к** сихырлы сәскә 2. *перен.* серле, сихырлы; **колдовска́я тишина́** серле тынлыҡ; **колдовско́й взгляд** сихырлы ҡараш

**КОЛДОВСТВО́** *с* сихыр, сихырсылыҡ; **занима́ться колдовство́м** сихыр менән шөғөлләнеү

**КОЛДУ́Н** *м* и **КОЛДУ́НЬЯ** *ж* сихырсы

**КОЛЕБА́НИЕ** *с* 1. *см.* **колеба́ться** 1; **колеба́ние ма́ятника** маятник тирбәлеүе; **звуковы́е колеба́ния** тауыш тирбәлеүе 2. үҙгәреп тороу; **колеба́ние цен** хаҡтарҙың үҙгәреп тороуы; **колеба́ние температу́ры** температураның үҙгәреп тороуы 3. икеләнеү; **по́сле до́лгих колеба́ний он согласи́лся** оҙаҡ икеләнеүҙән һуң ул ризалашты

**КОЛЕБА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тирбәлдергес, тирбәлдереп (бәүелдереп) тороусы; **колеба́тельные движе́ния** тирбәлдергес хәрәкәттәр

**КОЛЕБА́ТЬ** *несов. что* 1. (*раскачивать*) һелкетеү, бәүелдереү, тирбәлдереү, сайҡалдырыу; **ве́тер колы́шет ве́тки** ел ботаҡтарҙы тирбәлдерә 2. (*расшатывать*) ҡаҡшатыу; **колеба́ть усто́и жи́зни** тормош нигеҙен ҡаҡшатыу; **колеба́ть авторите́т** абруйҙы ҡаҡшатыу 3. (*вызывать сомнение*) икеләндереү, икеләнеү тыуҙырыу; **колеба́ть убежде́ния** *чьи-л.* *берәйһенең* ҡарашында икеләнеү тыуҙырыу

**КОЛЕБА́ТЬСЯ** *несов.* 1. һелкенеү, бәүелеү, тирбәлеү, сайҡалыу; **ли́стья коле́блются** япраҡтар тирбәлә; **пла́мя колеба́лось** ялҡын тирбәлде 2. ҡаҡшау; **в после́днее вре́мя его́ авторите́т на́чал колеба́ться** һуңғы ваҡытта уның абруйы ҡаҡшай төштө 3. үҙгәреп тороу; **глубина́ реки́ коле́блется** һыу тәрәнлеге үҙгәреп тора 4. икеләнеү; **колеба́ться в вы́боре** *чего-л.* *нимәнелер* һайлауҙа икеләнеү 5. *страд. от* **колеба́ть** 1

**КОЛЕ́НКА** *ж*; *разг. см.* **коле́но**

**КОЛЕНКО́Р** *м* коленкор (*туҡыма*) ♦ **друго́й (ино́й, не тот) коленко́р** *прост.* эш (һүҙ) бөтөнләй башҡа (*эш-ҡылыҡты, һүҙҙе хуплағанда әйтелә*)

**КОЛЕНКО́РОВЫЙ,** -ая, -ое 1. коленкор ...ы; **коленко́ровое произво́дство** коленкор етештереү 2. коленкорлы; **коленко́ровый переплёт кни́ги** коленкорлы китап тышы, коленкор тышлы китап

**КОЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое тубыҡ ...ы; **коле́нная ча́шечка** тубыҡ ҡапҡасы; **коле́нный суста́в** тубыҡ быуыны

**КОЛЕ́НО** *с* 1. (*мн.* **коле́ни**) тубыҡ; **разби́ть коле́но** тубыҡ яралау (ярыу); **стоя́ть на коле́нях** тубыҡланып тороу; **пантало́ны с протёртыми коле́нями** тубыҡтары ышҡылған панталон; **посади́ть на коле́ни** тубыҡҡа ултыртыу 2. (*мн.* **коле́на, коле́нья**) (*изгиб*) бөгөл, бөгөм; **коле́но кривоши́па** *тех.* кривошип бөгөмө; **коле́нья бамбу́ка** бамбук быуыны 3. (*мн.* **коле́на**) быуын, бөгөлөш; **до седьмо́го коле́на** ете быуынға тиклем; **в пе́нии соловья́ насчи́тывается деся́ток коле́н** һандуғас һайрауында унлаған төрлө тауыш бөгөлөшө була ♦ **мо́ре по коле́но (по коле́на)** *кому* диңгеҙ тубыҡтан; **поста́вить на коле́ни** *кого* тубыҡландырыу, теҙ сүктереү

**КОЛЕ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое 1. бөгөллө, бөгөмлө; **коле́нчатый вал** бөгөмлө вал 2. быуынлы; **коле́нчатый сте́бель** быуынлы һабаҡ

**КО́ЛЕР** *м* төҫ, буяу төҫө; **я́рко-си́ний ко́лер** асыҡ зәңгәр төҫ

**КОЛЕСИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** урап йөрөү; **охо́та была́ колеси́ть, когда́ есть прямая́ доро́га** тура юл барҙа, урап йөрөү ниңә кәрәк булғандыр **2.** ил гиҙеү, күп йөрөү; **колеси́ть по све́ту** ил (донъя) гиҙеү; **колеси́ть по степи́** дала буйлап күп йөрөү

**КОЛЕ́СНИК** и **КОЛЁСНИК** *м* тәгәрмәс оҫтаһы, тәгәрмәс яһаусы

**КОЛЕСНИ́ЦА** *ж* ике тәгәрмәсле арба; **боева́я колесни́ца** ике тәгәрмәсле һуғыш арбаһы; **бегова́я колесни́ца** ике тәгәрмәсле ярыш арбаһы; **триумфа́льная колесни́ца** ике тәгәрмәсле тантаналы йөрөү арбаһы

**КОЛЁСНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәгәрмәс ...ы; **колёсная мазь** тәгәрмәс майы; **колёсная доро́га** тәгәрмәс юлы **2.** тәгәрмәсле; **колёсный тра́ктор** тәгәрмәсле трактор

**КОЛЕСО́** *с* **1.** тәгәрмәс; **колесо́ теле́ги** арба тәгәрмәсе; **велосипе́дное колесо́** велосипед тәгәрмәсе; **пере́днее колесо́** алғы тәгәрмәс; **зубча́тое колесо́** тешле тәгәрмәс; **ме́льничное колесо́** һыу тирмәне тәгәрмәсе **2.** *в знач. нареч.* **колесо́м** тәгәрмәс һымаҡ, тәгәрмәстәй; **выгиба́ть спи́ну колесо́м** арҡаны тәгәрмәстәй көмрәйтеү ♦ **грудь колесо́м** ҡалҡыу, киң күкрәк; **но́ги колесо́м** ҡамыт аяҡ; **пя́тое колесо́ в теле́ге (колесни́це)** бер эшкә лә кәрәкһеҙ (яраҡһыҙ) түмәр башы; **на колёсах** ыңғай юлда булыу; **как нема́заное (несма́занное, неподма́занное) колесо́**: 1) майланмаған тәгәрмәс кеүек (*майһыҙ арба; шағыр-шоғор тауышҡа ҡарата*); 2) ауырлыҡ менән барған эш

**КОЛЕСОВА́ТЬ** *сов., несов. кого*; *ист.* тәгәрмәскә бәйләп язалау

**КОЛЕЯ́** *ж* **1.** тәгәрмәс эҙе, арба юлы; **глубо́кая колея́** тәрән тәгәрмәс эҙе **2.** *ж.-д.* юл, тимер юл, колея; **широ́кая колея́** киң колеялы тимер юл; **у́зкая колея́** тар колеялы тимер юл **3.** *перен.* юл, эҙ, һуҡмаҡ; **жизнь вошла́ в обы́чную колею́** тормош үҙ яйына инде (һалынды) ♦ **войти́ в колею́** үҙ яйына килеү; **вы́бить из колеи́** сафтан сығарыу, юлдан яҙҙырыу; **вы́биться из колеи́** сығырҙан сығыу

**КОЛИ́БРИ** *м* и *ж нескл.* колибри (*Америкала таралған бәләкәй ҡош*)

**КО́ЛИКИ** *мн.* (*ед.* **ко́лика** *ж*) сәнсеү, ҡатыу, сәнсеп алыу; (*у коров и лошадей*) сысҡансыҡ; **ко́лики в боку́** ҡабырғаны сәнсеү алыу, ҡатыу ҡаҙалыу; **печёночная ко́лика** бауыр сәнсеүе; **смея́ться до ко́лик** эс ҡатҡансы көлөү

**КОЛИ́Т** *м* колит (*йыуан эсәк ауырыуы*)

**КОЛИ́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое һан ...ы, һан яғынан; **коли́чественный ме́тод** һан ысулы; **коли́чественные измене́ния** һан яғынан үҙгәреш ♦ **коли́чественный ана́лиз** *хим.* һан яғынан анализ

**КОЛИ́ЧЕСТВО** *с* **1.** һан, иҫәп, миҡдар; **коли́чество люде́й** халыҡ иҫәбе; **коли́чество воды́** һыу миҡдары; **абсолю́тное коли́чество** абсолют һан **2.** *филос.* һан; **перехо́д коли́чества в ка́чество** һандың сифатҡа күсеүе

**КО́ЛКА** *ж см.* **коло́ть** II; **ко́лка дров** утын ярыу

**КО́ЛКИЙ I,** -ая, -ое сәнскәкле, сәнскеле; **ко́лкая трава́** сәнскәкле үлән

**КО́ЛКИЙ II,** -ая, -ое *разг.* шараҡ, ярылыусан, ватылыусан; **ко́лкие дрова́** шараҡ утын; **ко́лкий са́хар** ватылыусан шәкәр

**КО́ЛКОСТЬ** *ж* **1.** зәһәрлек, төртмә теллек; **ко́лкость замеча́ний** иҫкәртмәнең зәһәрлеге **2.** төртмә һүҙ, әсе һүҙ (тел); **говори́ть ко́лкости** әсе һүҙ әйтеү

**КОЛЛАБОРАЦИОНИ́СТ** *м* коллаборационист, һатлыҡ йән (*Икенсе донъя һуғышында фашистар баҫып алған ерҙәрҙә уларға ярҙам иткән, илен һатҡан кеше*)

**КОЛЛА́ПС** *м* коллапс (**1.** *мед. йөрәк тибешенең ҡапыл һүлпәнәйеүе һәм ҡан баҫымының төшөүе* **2.** *астр. гравитация көсө менән ҙур йондоҙҙарҙың ҡапыл йомолоп кесерәйеүе*)

**КОЛЛЕ́ГА** *м* и *ж*; *книжн.* коллега; (*по работе*) хеҙмәттәш; (*по учёбе*) һабаҡташ; **он — мой колле́га по университе́ту** ул — университет буйынса минең һабаҡташым

**КОЛЛЕГИА́ЛЬНОСТЬ** *ж* коллегиаллек (*бер төркөм кешеләрҙең бергәләшеп эш башҡарыу формаһы*); **коллегиа́льность реше́ния** ҡарарҙың коллегиаллеге

**КОЛЛЕГИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое коллегиаль, бергәләп; **коллегиа́льное руково́дство** коллегиаль етәкселек итеү

**КОЛЛЕ́ГИЯ** *ж* коллегия (**1.** *административ, башҡарма йәки кәңәшмә орган булып ойошҡан вазифалы кешеләр төркөмө* **2.** *ҡайһы бер профессия кешеләренең бергә эшләү өсөн берләшмәһе* **3.** *Рәсәйҙә XVIII б. үҙәк хөкүмәт учреждениеларының исеме*)

**КО́ЛЛЕДЖ** *м* колледж (*урта йәки юғары уҡыу йорто*)

**КОЛЛЕ́Ж** *м* коллеж (*Францияла, Бельгияла һәм Швейцарияның француз телле айырым кантондарында урта уҡыу йорто*)

**КОЛЛЕКТИ́В** *м* коллектив; **нау́чный коллекти́в** ғилми коллектив; **кре́пко спа́янный коллекти́в** ныҡ ойошҡан коллектив

**КОЛЛЕКТИВИЗА́ЦИЯ** *ж* коллективлаштырыу; **коллективиза́ция се́льского хозя́йства** ауыл хужалығын коллективлаштырыу

**КОЛЛЕКТИВИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* коллективлаштырыу; **коллективизи́ровать кресться́нское хозя́йство** крәҫтиән хужалығын коллективлаштырыу

**КОЛЛЕКТИВИ́ЗМ** *м* коллективлыҡ, коллективизм; **воспита́ние в ду́хе коллективи́зма** коллективлыҡ рухында тәрбиәләү

**КОЛЛЕКТИВИ́СТ** *м* и **КОЛЛЕКТИВИ́СТКА** *ж* коллективсы, бергәлекте яҡлаусы

**КОЛЛЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое коллектив(лыҡ), күмәк, бергәләп эшләнгән; **коллекти́вное руково́дство** коллектив етәкселек; **коллекти́вная рабо́та** бергәләп эшләнгән эш; **коллекти́вное хозя́йство** күмәк хужалыҡ; **коллекти́вное снабже́ние** коллектив тәьминәт; **коллекти́вный при́нцип** коллектив принцип

**КОЛЛЕ́КТОР** *м* коллектор (**1.** *берәй нәмәне йыйыу һәм бүлеп таратыу эше менән шөғөлләнгән ойошма* **2.** *берәй нәмәнең төрлө өлгөһөн йыйып, иҫәбен алып барған кеше* **3.** *тех. даими электр генераторының үҙгәреүсән токты даими токка әйләндерә торған өлөшө* **4.** *тех. канализация йәки газ өсөн булған киң торба* **5.** *тех. торба йәки кабель үткәреү өсөн ер аҫтынан эшләнгән юлдар*)

**КОЛЛЕКЦИОНЕ́Р** *м* коллекция йыйыусы, коллекционер; **стра́стный коллекционе́р** бик әүәҫ коллекционер

**КОЛЛЕКЦИОНИ́РОВАТЬ** *несов. что* йыйыу, коллекция йыйыу; **коллекциони́ровать кни́ги** китап йыйыу

**КОЛЛЕ́КЦИЯ** *ж* коллекция; **колле́кция минера́лов** минералдар коллекцияһы; **собира́ть колле́кцию** коллекция йыйыу

**КОЛЛИ́ЗИЯ** *ж* коллизия (*кешеләр араһындағы ҡапма-ҡаршы ҡараштарҙың, ынтылыштарҙың бәрелеше*); **жи́зненная колли́зия** тормош коллизияһы

**КОЛЛО́ДИЙ** *м*; *спец.* коллодий (*медицинала һәм фотографияла ҡулланылған эфир аралаш йәбешкәк иретмә*)

**КОЛЛО́ИД** *м*; *хим.* коллоид (*кристаллашмай торған матдә, мәҫ. крахмал, аҡһым, елем*)

**КОЛЛО́ИДНЫЙ,** -ая, -ое *хим.* коллоид ...ы; **колло́идные сво́йства** коллоид үҙенсәлектәре; **колло́идный раство́р** коллоид иретмәһе

**КОЛЛО́КВИУМ** коллоквиум (**1.** *студенттарҙың белемдәрен һынау һәм үҫтәреү маҡсатында уҙғарылған әңгәмә* **2.** *билдәле бер темаға, мәҫ., сәйәси, ғилми һ.б. сығыштар менән үткәрелә торған кәңәшмә*)

**КОЛОВОРО́Т** *м* **1.** сапҡыслы бырау **2.** өйрөлмәк; **коловоро́т кружи́л, разбры́згивая пе́ну** өйрөлмәк күбектәр сәсеп әйләндә **3.** *чего*; *перен.* өйрөлмәк, алмашыу, әйләнеш; **стреми́тельный коловоро́т собы́тий** ваҡиғаларҙың кинәт алмашыуы

**КОЛО́ДА I** *ж* **1.** түмәр, бүкән; **дубо́вая коло́да** имән түмәре; **руби́ть мя́со на коло́де** итте түмәргә һалып сабыу **2.** улаҡ; **водопо́йная коло́да** һыу эсереү улағы

**КОЛО́ДА II** *ж*; *карт.* колода; **коло́да карт** кәрт колодаһы

**КОЛО́ДЕЗНЫЙ,** -ая, -ое ҡоҙоҡ ...ы; **коло́дезная вода́** ҡоҙоҡ һыуы; **коло́дезный сруб** ҡоҙоҡ бураһы

**КОЛО́ДЕЦ** *м* ҡоҙоҡ, ҡойо; **коло́дец с лебёдкой** сығырлы ҡоҙоҡ; **коло́дец с журавлём** сиртмәле ҡоҙоҡ; **пить во́ду из коло́дца** ҡойонан һыу эсеү; **ша́хтный коло́дец** *спец.* шахта ҡоҙоғо

**КОЛО́ДКА** *ж*; *в разн. знач.* ҡалып; **коло́дка руба́нка** йышҡы ҡалыбы; **коло́дка тормозо́в** тормоз ҡалыбы; **о́рденская коло́дка** орден ҡалыбы; **сапо́жные коло́дки** итек ҡалыбы ♦ **все на одну́ коло́дку** бөтәһе бер ҡалыптан

**КОЛО́ДНИК** *м*; *обл.* ҡалып һалынған тотҡон

**КО́ЛОКОЛ** *м* **1.** ҡыңғырау; **звон ко́локола** ҡыңғырау сыңы **2.** *тех.* ҡалпаҡ; **водола́зный ко́локол** һыу аҫты ҡалпағы ♦ **звони́ть во все колокола́** бөтә донъяға таратыу (белдереү), яр һалыу

**КОЛОКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыңғырау ...ы; **колоко́льный звон** ҡыңғырау сыңы; **колоко́льный ма́стер** ҡыңғырау (ҡойоу) оҫтаһы

**КОЛОКО́ЛЬНЯ** *ж* сиркәү манараһы ♦ **смотре́ть (гляде́ть) со свое́й колоко́льни** үҙ (тар) ҡарашыңдан ғына сығып эш итеү

**КОЛОКО́ЛЬЧИК** *м* **1.** (бәләкәй) ҡыңғырау, сыңғырлаҡ; **сере́бряный колоко́льчик** бәләкәй көмөш ҡыңғырау **2.** *бот.* ҡыңғырау сәскә

**КОЛОНИАЛИ́ЗМ** *м* колониализм, колониаллек

**КОЛОНИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** колония ...ы; **колониа́льные наро́ды** колония халыҡтары; **колониа́льные стра́ны** колония илдәре; **колониа́льная систе́ма** колония системаһы **2.** *биол.* колония булып йәшәгән; **колониа́льные кора́лловые поли́пы** колония булып йәшәүсе мәрйен полиптары ♦ **колониа́льные во́йны** колониялар өсөн һуғыш

**КОЛОНИЗА́ТОР** *м* **1.** колонизатор **2.** *см.* **колони́ст**

**КОЛОНИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое колонизатор ...ы; **колониза́торская поли́тика** колонизаторҙар сәйәсәте

**КОЛОНИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое колонизацион; **колонизацио́нное движе́ние** колонизацион хәрәкәт

**КОЛОНИЗА́ЦИЯ** *ж* колониялаштырыу (**1.** *илде баҫып алып, үҙ файҙаһына әйләндереү* **2.** *буш ятҡан ерҙәргә халыҡ күсереп ултыртыу*); **колониза́ция сосе́дних стран** күрше илдәрҙе колониялаштырыу; **колониза́ция земе́ль** ерҙәрҙе колониялаштырыу

**КОЛОНИЗИ́РОВАТЬ** и **КОЛОНИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* колониялаштырыу, колонияға әйләндереү

**КОЛОНИ́СТ** *м* и **КОЛОНИ́СТКА** *ж* колонист, колония кешеһе

**КОЛО́НИЯ** *ж* колония (**1.** *империалистик дәүләт тарафынан баҫып алынған, иҙелгән ил* **2.** *сит илдән йәки өлкәнән буш ятҡан ергә күсеп ултырған халыҡтың ауылы* **3.** *яҡташтар берекмәһе* **4.** *берәй маҡсат менән йы-*

*йылған кешеләрҙең торлаҡ урыны* **5.** *биол. бергә берегеп йәшәгән тереклектәр төркөмө*)

**КОЛО́НКА** *ж* **1.** бағана, колонка; **коло́нка цифр** һандар бағанаһы; **писа́ть в две коло́нки** ике бағана итеп яҙыу **2.** колонка; **водоразбо́рная коло́нка** һыу колонкаһы; **бензозапра́вочная коло́нка** бензин заправкалау колонкаһы; **га́зовая коло́нка** газ колонкаһы

**КОЛО́ННА** *ж* **1.** колонна, бағана, терәү, терәк; **дом с коло́ннами** колонналы өй; **Триумфа́льная коло́нна** Тантана колоннаһы **2.** колонна, теҙмә; **коло́нна демонстра́нтов** демонстранттар колоннаһы; **похо́дная коло́нна** юлға сығыу колоннаһы; **кильва́терная коло́нна** кильватер теҙмәһе **3.** бағана; **две коло́нны по́дписей** ике бағана итеп ҡуйылған ҡултамғалар **4.** *тех.* колонна

**КОЛОННА́ДА** *ж* колонналар теҙмәһе (рәте); **мра́морная колонна́да** мәрмәр колонналар теҙмәһе

**КОЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое колонналы; **коло́нный зал** колонналы зал

**КОЛОНО́К** *м* һары шәшке

**КОЛОНТИ́ТУЛ** *м*; *полигр.* колонтитул (*әҫәрҙең, бүлектең йәки киҫәктәрҙең һәр биттә текстан юғарыраҡ өлөштә баҫылған исеме*)

**КОЛОНЦИ́ФРА** *ж*; *полигр.* колонцифр (*китаптың, журналдың бит һанын күрһәткән цифр*)

**КОЛОРАТУ́РА** *ж*; *муз.* колоратура (**1.** *яңғыҙ йырға көйҙө матурлау өсөн индерелгән ҡатмарлы биҙәк* **2.** *тауыштың шул биҙәктәрҙе анһат башҡарыу һәләте*)

**КОЛОРИ́Т** *м* **1.** колорит (*һүрәтте берләштереп торған буяу һәм төҫтәрҙең бәйләнеше, тап килеше*); **я́ркий колори́т** асыҡ колорит **2.** *перен.* колорит, үҙенсәлек, төҫ (*берәй нәмәнең үҙенә хас сифаттар, үҙенсәлектәр йыйылмаһы*); **поэти́ческий колори́т** поэтик үҙенсәлек; **юмористи́ческий колори́т** юмористик төҫ

**КОЛОРИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** колоритлы; **колори́тный пейза́ж** колоритлы пейзаж **2.** *перен.* үҙенсәлекле, колоритлы, көслө, үҙенә бер төрлө; **колори́тный язы́к** үҙенсәлекле тел

**КО́ЛОС** *м* башаҡ; **ко́лос ржи** арыш башағы

**КОЛОСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое күп (эре) башаҡлы; **колоси́стая рожь** күп эре башаҡлы арыш

**КОЛОСИ́ТЬСЯ** *несов.* башаҡланыу, башаҡ ебәреү (сығарыу); **пшени́ца колоси́тся** бойҙай башаҡ ебәрә

**КОЛОСНИКИ́** *мн.* (*ед.* **колосни́к** *м*) **1.** рәшәткә, селтәр (*мейес ауыҙы аҫтындағы суйын рәшәткә*) **2.** һәндерә (*комалаҡ, көлтә кецекте киптерец өсөн арҡыры ағастар һалып эшләнә*) **3.** *театр.* рәшәткә (*театр сәхнәһенең декорацияларын юғарынан беркетеп ҡуйыу өсөн эшләнгән ағас ҡулайлама*)

**КОЛОСОВО́Й,** -ая, -ое **1.** башаҡлы; **колосовы́е культу́ры** башаҡлы культуралар **2.** *в знач. сущ.* **колосовы́е** *мн.*; *бот.* башаҡлылар, башаҡлы ашлыҡтар; **убо́рка колосовы́х** башаҡлы ашлыҡтарҙы йыйыу

**КОЛО́СС** *м* **1.** мөһабәт һын **2.** *перен.* күренекле, атаҡлы, бик ҙур; **коло́сс нау́ки** фәндең атаҡлы ғалимы; **коло́сс мы́сли** бик ҙур фекер эйәһе ♦ **коло́сс на гли́няных нога́х** *книжн.* һалам-торхан (*тыштан мөһабәт, эстән таралырға торған нәмәгә ҡарата*)

**КОЛОССА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ғәйәт (ғәләмәт) ҙур; **колосса́льный успе́х** ғәйәт ҙур уңыш; **колосса́льные бога́тства** ғәләмәт ҙур байлыҡ

**КОЛОТИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*, *по чему*, *во что* һуғыу, ҡағыу, шаҡылдатыу, дөпөлдәтеү; **колоти́ть в дверь** ишек ҡағыу; **колоти́ть в бараба́н** барабанға һуғыу **2.** *что* ҡағыу; **колоти́ть ковёр** балаҫ ҡағыу **3.** *кого-что*; *разг.* һуғыу, дөмбәҫләү, туҡмау; **колоти́ть лошаде́й** аттарҙы туҡмау; **колоти́ть врага́** дошманды дөмбәҫләү **4.** *что*; *разг.* ватыу, ҡыйратыу; **колоти́ть посу́ду** һауыт-һаба ватыу **5.** *кого-что*; *разг.* ҡалтыратыу; **его́ коло́тит лихора́дка** уны биҙгәк (тапма) ҡалтырата

**КОЛОТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** бәрелеү, һуғылыу, ҡалтырау; **от ве́тра ста́вни колоти́лись о сте́ны** тәҙрә ҡапҡастары елдән стенаға бәрелде; **зу́бы колоти́лись оди́н о друго́й** тештәре тешкә теймәй ҡалтырай **2.** *разг.* (*о сердце*) дөпөлдәү, дөп-дөп итеү; **се́рдце си́льно коло́тится** йөрәк ныҡ дөпөлдәй **3.** *страд. от* **колоти́ть** 2

**КОЛОТУ́ШКА** *ж* **1.** туҡмаҡ, бәләк; **колоту́шка для конопли́** киндер туҡмағы **2.** шалтырмаҡ, шаҡылдауыҡ; **вдали́ слы́шалась колоту́шка сто́рожа** алыҫта ҡарауылсының шаҡылдауығы ишетелде **3.** *обычно мн.* **колоту́шки**; *прост.* туҡмаҡ; **надава́ть колоту́шек** туҡмаҡ ашатыу

**КО́ЛОТЫЙ I,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **коло́ть** I; **2.** *прил.* сәнселгән; **ко́лотый штыко́м** штык менән сәнселгән; **ко́лотая ра́на** сәнсеүҙән ҡалған яра, сәнселгән яра

**КО́ЛОТЫЙ II,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **коло́ть** II; **2.** *прил.* ярылған, туралған, ваҡланған; **ко́лотый топоро́м** балта менән ярылған; **ко́лотый са́хар** ваҡланған шәкәр; **ко́лотые дрова́** ярылған утын

**КОЛО́ТЬ I** *несов.* **1.** *кого-что* сәнсеү, ҡаҙау; **щё́бень ко́лет но́ги** ваҡланған таштар аяҡты сәнсә; **коло́ть игло́й** энә менән сәнсеү **2.** *что*, *в чём* и *без доп.*, *безл.* сәнсеү; **в боку́ ко́лет** ҡабырға сәнсә **3.** *кого-что* сәнсеү, һуйыу, боғаҙлау; **коло́ть штыко́м** штык менән сәнсеү; **коло́ть свине́й** сусҡа һуйыу **4.** *перен.* сәнсеү, сағыу, әйтеү; **коло́ть язви́тельными слова́ми** сәнскеле һүҙҙәр (менән сағыу) әйтеү ♦ **коло́ть глаза́** *кому*, *чем* күҙенә төртөп әйтеү; **пра́вда глаза́ ко́лет** тура әйткән туғанына ярамаған; (**темно́,**) **хоть глаз коли́ (вы́коли)** дөм ҡараңғы, күҙгә төртһәң дә күренмәй

**КОЛО́ТЬ II** *несов. что* ярыу, ваҡлау, ватыу; **коло́ть оре́хи** сәтләүек ярыу; **коло́ть лёд** боҙ ватыу; **коло́ть са́хар** шәкәр ваҡлау

**КОЛО́ТЬСЯ I** *несов.* сәнсеү; **хво́я ко́лется** ылыҫ сәнсә

**КОЛО́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** ярылыу, ватылыу, ваҡланыу; **оси́новые дрова́ хорошо́ ко́лются** уҫаҡ утын яҡшы ярыла **2.** *страд. от* **коло́ть** II

**КОЛОШЕ́НИЕ** *с* башаҡланыу, баш ебәреү, баш ҡоҫоу; **колоше́ние пшени́цы** бойҙай башаҡланыуы

**КОЛПА́К** *м* **1.** ҡалпаҡ; **во́йлочный колпа́к** кейеҙ ҡалпаҡ; **колпа́к с позуме́нтом** уҡалы ҡалпаҡ **2.** (*покрышки*) ҡалпаҡ, ҡапҡас; **деревя́нный колпа́к** ағас ҡапҡас ♦ **держа́ть под (стекля́нным) колпако́м** *кого* өф итеп тотоу, ел-ямғыр тейҙермәү; **под (стекля́нным) колпако́м (жить, находи́ться)** михнәт күрмәйенсә (йәшәү һ.б.)

**КОЛТУ́Н** *м*; *вет.*, *мед.* сәс кейеҙләнеү (*ауырыу төрө*)

**КОЛУМБА́РИЙ** *м* колумбарий (*яндырылған мәйеттең көлөн һаҡлау урыны*)

**КОЛУ́Н** *м* һәрпәк; **тяжёлый колу́н** ауыр һәрпәк

**КОЛХО́З** *м* (*коллективное хозяйство*) колхоз (*коллектив хужалыҡ*); **передово́й колхо́з** алдынғы колхоз

**КОЛХО́ЗНИК** *м* и **КОЛХО́ЗНИЦА** *ж* колхозсы; **собра́ние колхо́зников** колхозсылар йыйылышы

**КОЛХО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое колхоз …ы; **колхо́зные поля́** колхоз баҫыуҙары; **колхо́зный ры́нок** колхоз баҙары

**КОЛЧА́Н** *м* ҡорман, һаҙаҡ, ҡалъян

**КОЛЧЕДА́Н** *м*; *мин.* колчедан; **ме́дный колчеда́н** баҡыр колчеданы; **се́рный колчеда́н** көкөрт колчеданы

**КОЛЧЕДА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** колчедан …ы; **колчеда́нные за́лежи** колчедан ятҡылыҡтары **2.** колчеданлы; **колчеда́нные ру́ды** колчеданлы мәғдән

**КОЛЫБЕ́ЛЬ** *ж* **1.** бишек, сәңгелдәк; **кача́ть колыбе́ль** бишек бәүелтеү **2.** *перен.*, *высок.* бишек; **колыбе́ль револю́ции** революция бишеге ♦ **с колыбе́ли**; **от колыбе́ли** тыуған көндән үк

**КОЛЫБЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бишек …ы, сәңгелдәк …ы; **колыбе́льная пе́сня** бишек йыры

**КОЛЫМА́ГА** *ж*; *пренебр.* ҙур, ауыр арба

**КОЛЫХА́ТЬ** *несов. что* тулҡынландырыу, һелкетеү, сайҡалдырыу, елберләтеү; **ве́тер колы́шет рожь** ел арышты сайҡалдыра; **колыха́ть знамёна** байраҡтарҙы елберләтеү

**КОЛЫХА́ТЬСЯ** *несов.* тулҡыныу, һелкенеү, сайҡалыу, елберләү; **ковы́ль колы́шется на ветру́** ҡылған елдә тулҡынлана; **знамёна колы́шутся** байраҡтар елберләй

**КОЛЫХНУ́ТЬ** *сов. см.* **колыха́ть**

**КОЛЫХНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **колыха́ться**

**КОЛЬЕ́** *с нескл.* колье (*аҫыл таштарҙан йәки ынйылы муйынсаҡ*)

**КОЛЬНУ́ТЬ** *сов. см.* **коло́ть** I 1, 2, 4

**КОЛЬРА́БИ** *ж нескл.* кольраби (*кәбеҫтә төрө*)

**КОЛЬТ** *м* кольт (*револьвер төрө*)

**КОЛЬЦЕВА́НИЕ** *с см.* **кольцева́ть**; **кольцева́ние птиц** ҡоштарҙы балдаҡлау

**КОЛЬЦЕВА́ТЬ** *несов.*; *спец.* **1.** *кого* (*о птицах, рыбах*) балдаҡлау, балдаҡ кейҙереү (*фәнни тикшеренеү маҡсаты менән*) **2.** *что* (*о деревьях*) дүңгәләкләү, ҡулсалау (*ағас буйға үҫмәһен өсөн дүңгәләкләп ҡабығын һыҙырыу*; *зарарлы бөжәктәр үрмәләмәһен өсөн ағас олонона дүңгәләкләп ыҫмала һөртөү*)

**КОЛЬЦЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** түңәрәк …ы; **кольцева́я фо́рма** түңәрәк формаһы **2.** түңәрәк, дүңгәләк һымаҡ; **кольцево́й маршру́т** түңәрәк маршрут; **кольцево́е окруже́ние** *воен.* дүңгәләк һымаҡ ҡамау

**КОЛЬЦО́** *с* **1.** дүңгәләк, сыңға; **кольцо́ для ключе́й** асҡыс дүңгәләге; **кольцо́ парашю́та** парашют сыңғаһы; **стально́е кольцо́** тимер сыңға **2.** (*украшение*) балдаҡ, йөҙөк; **обруча́льное кольцо́** никах балдағы; **кольцо́ с бриллиа́нтом** бриллиантлы йөҙөк **3.** *чего* (*то, что имеет форму такого предмета*) дүңгәләк; **пуска́ть ко́льца ды́ма** төтөн дүңгәләктәре ебәреү **4.** (*конечный пункт маршрута транспорта*) әйләнеш; **трамва́йное кольцо́** трамвай әйләнеше ♦ **годи́чные ко́льца** *бот.* йыллыҡ балдаҡ (*ағаста*)

**КО́ЛЬЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** дүңгәләкле, сыңғалы; **ко́льчатая сеть** дүңгәләкле селтәр **2.** *зоол.* балдаҡлы; **ко́льчатые че́рви** балдаҡлы селәүсендәр; **ко́льчатая змея́** балдаҡлы йылан

**КОЛЬЧУ́ГА** *ж* һайман, тимер күлдәк; **наде́ть кольчу́гу** һайман кейеү

**КОЛЮ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** сәнскәкле, сәнскеле, энәле; (*об усах, бороде*) сәнскәк; **колю́чий куста́рник** сәнскәкле ҡыуаҡ; **колю́чая про́волока** сәнскеле тимер сыбыҡ **2.** (*вызывающий болезненное ощущение*) сәнсеп алғандай, сағып алғандай; **колю́чая боль** сәнсеп алғандай ауыртыу **3.** *перен.* әсе, төртмә; **колю́чее сло́во** төртмә һүҙ

**КОЛЮ́ЧКА** *ж* сәнскәк, сәнске, энә; **колю́чки ка́ктуса** кактус сәнскеһе; **колю́чки ежа́** терпе энәһе

**КО́ЛЮШКА** *ж* терпе балыҡ

**КО́ЛЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **коло́ть** I; **2.** *прил.* осло, сәнскеле, сәнсеүсән, ҡаҙалыусан, сәнсә (ҡаҙай) торған; **ко́лющие о́рганы у насеко́мых** бөжәктәрҙең сәнсә торған ағзалары **3.** *прил.* сәнсеп-сәнсеп алған; **ко́лющая боль в боку́** ҡабырғаның сәнсеп-сәнсеп ауыртыуы

**КОЛЯДА́** *ж* коляда (*Раштыуа байрамы ваҡытында йыр менән үткәрелә торған йола*)

**КОЛЯ́СКА** *ж* коляска (**1.** *көймәле арба* **2.** *балалар арбаһы* **3.** *махсус арба*); **коля́ска**

**для инвали́дов** ғәриптәр коляскаһы; **мотоци́кл с коля́ской** коляскалы мотоцикл

**КОМ** *м* йомарлам, йомарлаҡ; **ком гли́ны** балсыҡ йомарламы; **ком сне́га** ҡар йомарлағы; **лепи́ть сне́жные ко́мья** ҡар йомарлау ♦ **ком в го́рле** тамаҡтағы төйөн; **ком подступи́л (подкати́лся) к го́рлу** тамаҡҡа төйөн ултырҙы; **пе́рвый блин ко́мом** тәүге эш — кәүеш (ҡыйыш)

**КО́МА** *ж*; *мед.* кома (*тәрән йоҡоға оҡшаған иҫһеҙ хәл*)

**КОМА́НДА** *ж*; *в разн. знач.* команда; **пода́ть кома́нду** команда биреү; **приня́ть кома́нду** команданы ҡабул итеү; **под кома́ндой офице́ра** офицер командаһы (ҡулы) аҫтында (буйынса), офицер командалығында; **вое́нная кома́нда** хәрби команда; **пожа́рная кома́нда** янғын һүндереү командаһы; **спаса́тельная кома́нда** ҡотҡарыу командаһы; **кома́нда кре́йсера** крейсер командаһы; **футбо́льная кома́нда** футбол командаһы ♦ **как по кома́нде** берҙәм, дәррәү

**КОМАНДА́РМ** *м* (*командующий армией*) командарм (*ғәскәр башлығы*)

**КОМАНДИ́Р** *м* командир; **команди́р полка́** полк командиры; **команди́р ро́ты** рота командиры; **команди́р дружи́ны** дружина командиры

**КОМАНДИРОВА́НИЕ** *с см.* **командирова́ть**

**КОМАНДИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **командирова́ть 2.** *прил.* командировкаға ебәрелгән, командировкалағы; **командиро́ванные курса́нты** командировкалағы курсанттар

**КОМАНДИРОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* командировкаға ебәреү

**КОМАНДИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **командирова́ть 2.** командировка, сәфәр; **получа́ть командиро́вку** командировка алыу; **напра́вить в командиро́вку** командировкаға ебәреү

**КОМАНДИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** командировка ...ы; **командиро́вочные расхо́ды** командировка сығымы **2.** *в знач. сущ.* **командиро́вочные** *мн.* командировка аҡсаһы ♦ **командиро́вочное удостовере́ние** командировка танытмаһы

**КОМАНДИ́РСКИЙ,** -ая, -ое **1.** командир ...ы; **команди́рский о́пыт** командир тәжрибәһе; **команди́рская обя́занность** командир вазифаһы **2.** *перен.* командирҙар ...ы; **команди́рский тон** командирҙар тоны

**КОМА́НДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** команда ...ы; **кома́ндное пе́рвенство** команда беренселеге; **кома́ндные соревнова́ния** команда ярыштары **2.** командир ...ы, командирҙар ...ы, командирлыҡ ...ы; **кома́ндный соста́в** командирҙар составы; **кома́ндные ка́дры** команда кадрҙары **3.** өҫтөнлөклө, өҫтөнлөк итеүсе, юғары; **кома́ндное положе́ние** юғары дәрәжә ♦ **кома́ндная высота́ (пози́ция)** *воен.* әһәмиәтле бейеклектәр; **кома́ндный пункт** команда пункты; **кома́ндный соста́в**: 1) хәрби етәкселек составы; 2) етәкселәр составы

**КОМА́НДОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **кома́ндовать 2.** *собир.*; *спец.* командование, командирҙар; **верхо́вное кома́ндование** юғары командование; **кома́ндование полка́** полк командованиеһы

**КОМА́НДОВАТЬ** *несов.* **1.** команда биреү; **кома́ндовать зы́чным го́лосом** яңғырауыҡлы, көр тауыш менән команда биреү **2.** *чем* командалау, командалыҡ итеү; **кома́ндовать пара́дом** парад менән командалыҡ итеү; **кома́ндовать ро́той** рота менән командалыҡ итеү **3.** *кем-чем, над кем-чем* и *без доп.* бойороу, бойороҡ биреү, бойороп тороу; **он не лю́бит, когда́ над ним кома́ндуют** ул үҙ өҫтөнән бойороп торғанды яратмай

**КОМАНДО́Р** *м* командор (**1.** *тар. Урта быуатта рыцарҙар орденындағы юғары дәрәжә* **2.** *спорт ойошмалары етәксеһе*)

**КОМА́НДУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **кома́ндовать 2.** *в знач. сущ.* **кома́ндующий** *м* башлыҡ, командующий; **кома́ндующий а́рмией** ғәскәр башлығы, армия командующийы

**КОМА́Р** *м* серәкәй; **маляри́йный кома́р** тапма серәкәйе ♦ **кома́р но́су (но́са) не подто́чит** бәйләнерлек урын юҡ, кәмселеге юҡ

**КОМАРИ́НЫЙ,** -ая, -ое серәкәй ...ы; **комари́ный уку́с** серәкәй тешләүе

**КОМАТО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *мед.* кома ...ы; **комато́зное состоя́ние** кома хәле

**КОМБА́ЙН** *м* комбайн; **у́гольный комба́йн** күмер комбайны; **самохо́дный комба́йн** үҙйөрөшлө комбайн; **зерноубо́рочный комба́йн** ашлыҡ урыу комбайны

**КОМБА́ЙНЕР** и *разг.* **КОМБАЙНЁР** *м*, **КОМБА́ЙНЕРКА** *разг.* и *прост.* **КОМБАЙНЁРША** *ж* комбайнсы

**КОМБА́ЙНОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** комбайн ...ы; **комба́йновый заво́д** комбайн заводы **2.** комбайн менән; **комба́йновая убо́рка зерна́** комбайн менән ашлыҡ урыу

**КОМБА́Т** *м* комбат (**1.** *батальон командиры* **2.** *батарея командиры*)

**КОМБИЖИ́Р** *м* ҡатнаш май, комбижир

**КОМБИКО́РМ** *м* ҡатнаш аҙыҡ, комбикорм

**КОМБИНА́Т** *м* комбинат; **мя́со-моло́чный комбина́т** ит-һөт комбинаты; **комбина́т бытово́го обслу́живания** көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү комбинаты; **учё́бный комбина́т** уҡыу комбинаты

**КОМБИНА́ТОР** *м*; *разг., шутл., ирон.* сос (йылғыр) кеше, комбинатор

**КОМБИНАТО́РНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* комбинаторлы; **комбинато́рный ана́лиз** комбинаторлы анализ

**КОМБИНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *спец.* комбинация ...ы, комбинациялы; **комбинацио́нная табли́ца** комбинация таблицаһы; **комбинацио́нная игра́** комбинациялы уйын

**КОМБИНА́ЦИЯ** *ж* комбинация (**1.** *бер төрлө нәмәләрҙе берләштереү, ҡушыу* **2.** *хәйләле*

*юл, хәйләгә ҡоролған алым* **3.** *спорт. йөрөш, юл, аҙым* **4.** *ҡатын-ҡыҙҙың эске кџлдәге*); **ша́хматная комбина́ция** шахмат йөрөшө; **комбина́ция цифр** цифрҙар комбинацияһы; **ло́вкая комбина́ция** хәйләле комбинация

**КОМБИНЕЗО́Н** *м* комбинезон (*курткаһы менән салбары тоташ тегелгән кейем*); **де́тский комбинезо́н** балалар комбинезоны

**КОМБИНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое ҡатнаш, төрлө нәмәләрҙән торған, ҡорамалап эшләнгән; **комбини́рованные корма́** ҡатнаш аҙыҡ; **комбини́рованное пла́тье** ҡорамалап тегелгән күлдәк

**КОМБИНИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *что* берләштереү, аралаштырыу, ҡатнаштырыу, аралап ҡушыу, комбинациялау; **комбини́ровать кра́ски** буяуҙарҙы аралап ҡушыу **2.** *разг.* (*строить комбинацию*) комбинация яһау, юлын табыу

**КОМЕДИА́НТ** *м* **1.** *уст.* кәмитсе, кәмит уйнаусы, комедиант **2.** *презр.* ике йөҙлө кеше, монафиҡ

**КОМЕДИА́НТСТВО** *с*; *презр.* ике йөҙлөлөк, монафиҡлыҡ; **ви́деть зло́бу и комедиа́нтство** асыу һәм монафиҡлыҡты күреү

**КОМЕ́ДИЯ** *ж* **1.** *лит.*, *театр.* комедия; **класси́ческая коме́дия** классик комедия; **писа́ть коме́дию** комедия яҙыу; **ста́вить коме́дию** комедия ҡуйыу **2.** *презр.* ике йөҙлөлөк, монафиҡлыҡ ♦ **разы́грывать (лома́ть, игра́ть и т.п.) коме́дию** ҡыланыу

**КО́МЕЛЬ** *м* төп (яҡ), аҫҡы өлөш (*ағастың, үләндең, сәстең тамырға кҫскән ере*); **класть бревно́ ко́млем** бүрәнәне төп яғы менән һалыу

**КОМЕНДА́НТ** *м* комендант; **коменда́нт кре́пости** ҡәлғә коменданты; **коменда́нт го́рода** ҡала коменданты; **коменда́нт общежи́тия** ятаҡ коменданты

**КОМЕНДА́НТСКИЙ,** -ая, -ое комендант …ы; **коменда́нтский патру́ль** комендант патруле; **коменда́нтский час** комендант сәғәте (*күрһәтелгән сәғәттәрҙә урамға сығырға тыйылған ваҡыт*)

**КОМЕНДАТУ́РА** *ж* комендатура (*комендант урынлашҡан бина һәм комендант етәкселек иткән учреждение*); **про́пуск выдаётся в комендату́ре** пропуск комендатурала бирелә

**КОМЕ́ТА** *ж* комета, ҡойроҡло йондоҙ

**КО́МИ** *мн. нескл.* **1.** (*ед.* **ко́ми** *м* и *ж*) комиҙар, коми халҡы **2.** *в знач. прил.* коми …ы; **ко́ми язы́к** коми теле

**КОМИ́ЗМ** *м* комизм, көлкөлөлөк, мәрәкәлек, мәҙәклек; **коми́зм положе́ния** хәлдең мәҙәклеге; **коми́зм игры́ актёра** актёр уйынының мәрәкәлеге

**КО́МИК** *м* **1.** комик (*комедияла уйнаусы актёр*) **2.** *разг.* мәҙәксе, кәмитсе

**КО́МИКС** *м* комикс (*мажараларға ҡоролған рәсемле хикәйә жанры*)

**КО́МИ-ПЕРМЯКИ́** *мн.* коми-пермяктар, коми-пермяк халҡы // *ед.* **ко́ми-пермя́к** *м* коми-пермяк ир-аты; **ко́ми-пермя́чка** *ж* коми-пермяк ҡатын-ҡыҙы

**КО́МИ-ПЕРМЯ́ЦКИЙ,** -ая, -ое коми-пермяк …ы; **ко́ми-пермя́цкий язы́к** коми-пермяк теле

**КОМИССА́Р** *м* комиссар ♦ **вое́нный комисса́р** хәрби комиссар

**КОМИССАРИА́Т** *м* комиссариат ♦ **вое́нный комиссариа́т** хәрби комиссариат

**КОМИССИОНЕ́Р** *м* комиссионер (*һатыуалыу эшендә аралашлыҡ итеүсе кеше*)

**КОМИССИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** комиссия …ы, комиссион; **комиссио́нный догово́р** комиссия килешеүе; **комиссио́нный магази́н** комиссион магазин; **комиссио́нный това́р** комиссион тауар **2.** *в знач. сущ.* **комиссио́нные** *мн.* комиссия аҡсаһы

**КОМИ́ССИЯ I** *ж* комиссия (**1.** *гәҙәттә, сауҙа менән бәйле эштә билдәле хаҡҡа үтәлә торған йомош* **2.** *махсус магазиндың шәхси кешегә нимәһендер һатышып биргән ярҙамы*); **сдать ве́щи на коми́ссию** әйберҙәрҙе комиссияға тапшырыу; **приём на коми́ссию музыка́льных инструме́нтов** комиссияға музыка ҡоралдарын ҡабул итеү

**КОМИ́ССИЯ II** *ж* комиссия; **избира́тельная коми́ссия** һайлау комиссияһы; **приёмная коми́ссия** ҡабул итеү комиссияһы; **враче́бная коми́ссия** врачтар (табиптар) комиссияһы

**КОМИССОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого*; *разг.* комиссиянан үткәрмәү; **комиссо́ван по боле́зни** ауырыуы арҡаһында комиссиянан үткәрмәнеләр, хеҙмәткә яраҡһыҙ

**КОМИТЕ́Т** *м* комитет; **комите́т ветера́нов труда́** хеҙмәт ветерандары комитеты

**КОМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** комедия …ы; **коми́ческий сюже́т** комедия сюжеты; **коми́ческий актёр** комедия актёры **2.** комик …ы; **коми́ческий тала́нт** комик талант **3.** *см.* **коми́чный** ♦ **коми́ческая о́пера** комик опера

**КОМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое көлкө(лө), мәҙәк, мәрәкә, ҡыҙыҡ(лы); **коми́чный вид** көлкөлө ҡиәфәт; **коми́чная исто́рия** мәҙәк ваҡиға

**КО́МКАТЬ** *несов. что* **1.** йомарлау, уҡмаштырыу; **ко́мкать в рука́х бума́гу** ҡулда ҡағыҙ йомарлау **2.** *перен.*, *разг.* ашығыс ҡыҫҡартыу (бөтөрөү); **ко́мкать разгово́р** әңгәмәне ашығыс бөтөрөү

**КОМКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое суғырмаҡлы; **комкова́тая по́чва** суғырмаҡлы ер

**КО́МЛЕВЫЙ,** -ая, -ое аҫҡы өлөш …ы; **ко́млевая часть ствола́** олондоң аҫҡы өлөшө

**КОМЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое йыуан төплө, аҫҡы өлөшө йыуан; **комли́стые брёвна** йыуан төплө бүрәнәләр

**КОММЕНТА́РИЙ** *м* **1.** комментарий, аңлатма, төшөндөрмә; **ру́копись с коммента́рием** аңлатма бирелгән ҡулъяҙма **2.** *обычно мн.* **коммента́рии** (*рассуждения*) асыҡлау, асыҡлама,

аңлатма ♦ **коммента́рии изли́шни** асыҡлауҙың кәрәге юҡ

**КОММЕНТА́ТОР** *м* комментатор, аңлатма биреүсе; **о́пытный коммента́тор** тәжрибәле комментатор

**КОММЕНТА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое комментатор …ы, аңлатма биреүсе …ы; **коммента́торская каби́на** комментатор кабинаһы

**КОММЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* комментарий (аңлатма) биреү; **комменти́ровать текст** текстҡа комментарий биреү; **комменти́ровать собы́тия** ваҡиғаларға аңлатма биреү

**КОММЕРСА́НТ** *м* коммерсант, сауҙагәр, малтабар

**КОММЕ́РЦИЯ** *ж* коммерция, сауҙа; **занима́ться комме́рцией** сауҙа менән шөғөлләнеү

**КОММЕ́РЧЕСКИЙ,** -ая, -ое коммерция …ы, сауҙа …ы; **комме́рческое предприя́тие** коммерция предприятиеһы; **комме́рческая де́ятельность** сауҙа эшмәкәрлеге ♦ **комме́рческий дире́ктор** коммерция директоры (*предприятие директорының тәьмин итеү, һатыу буйынса урынбаҫары*)

**КОММИВОЯЖЁР** *м* коммивояжёр (*берәй предприятиеның тауар өлгөләрен күрһәтеп йөрөп, заказ йыйыусы агент*)

**КОММУ́НА** *ж* коммуна (**1.** *хеҙмәт һәм мөлкәт уртаҡлығы нигеҙендә берләшкән коллектив* **2.** *ҡайһы бер сит илдәрҙә түбәнге административ-территориаль берәмек*); **трудова́я комму́на** хеҙмәт коммунаһы ♦ **Пари́жская комму́на** *ист.* Париж коммунаһы; **сельскохозя́йственная комму́на** ауыл хужалығы коммунаһы

**КОММУНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** коммуна …ы; **коммуна́льные вы́боры** коммуна һайлауҙары **2.** коммуналь; **коммуна́льное строи́тельство** коммуналь төҙөлөш; **коммуна́льное хозя́йство** коммуналь хужалыҡ; **коммуна́льные услу́ги** коммуналь хеҙмәтләндереү ♦ **коммуна́льная кварти́ра** коммуналь фатир

**КОММУНА́Р** *м* коммунар (**1.** *тар. Париж коммунаһында ҡатнашыусы* **2.** *коммуна ағзаһы*)

**КОММУНИ́ЗМ** *м* коммунизм ♦ **вое́нный коммуни́зм** хәрби коммунизм

**КОММУНИКА́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тиҙ (еңел) аралашыусан, тиҙ (еңел) аралаша торған; **коммуника́бельный челове́к** еңел аралашыусан кеше

**КОММУНИКАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* коммуникатив …ы, аралашыу …ы; **коммуникати́вная фу́нкция языка́** телдең аралашыу функцияһы

**КОММУНИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое бәйләнеш …ы, элемтә …ы, коммуникация …ы; **коммуникацио́нная ли́ния** элемтә линияһы

**КОММУНИКА́ЦИЯ** *ж* **1.** *спец.* бәйләнеш, элемтә, коммуникация; **во́дные коммуника́ции** һыу юлы бәйләнеше; **переpе́зать коммуника́ции проти́вника** дошмандың коммуникацияһын өҙөү; **тепловы́е коммуника́ции** йылылыҡ коммуникациялары **2.** *лингв.* коммуникация, аралашыу; **речь как сре́дство коммуника́ции** тел аралашыу сараһы

**КОММУНИ́СТ** *м* коммунист

**КОММУНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** коммунистик; **коммунисти́ческое о́бщество** коммунистик йәмғиәт **2.** коммунист …ы; **коммунисти́ческая па́ртия** коммунистар партияһы

**КОММУТА́ТОР** *м* коммутатор (**1.** *электр тогын тоташтырыу, өҙөү йәки йүнәлешен үҙгәртеү ҡулайламаһы* **2.** *телефон элемтәһен ҡул менән тоташтырыу өсөн ҡулайлама*)

**КОММУТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *эл.* коммутация …ы, коммутацион; **коммутацио́нная аппарату́ра** коммутация аппаратураһы

**КОММУТА́ЦИЯ** *ж*; *эл.* коммутация (**1.** *махсус аппаратура ярҙамында электр йүнәлешенең үҙгәртелеше* **2.** *телефон, телеграф һәм радио станцияларындағы электр сымдарын, ҡорамалдарын тоташтырыу системаһы*)

**КОММЮНИКЕ́** *с нескл.*; *полит.* коммюнике (*хөкүмәттең халыҡ-ара әһәмиәте булған мәсьәләләр тураһында рәсми белдереүе*)

**КО́МНАТА** *ж* бүлмә; **кварти́ра из трёх ко́мнат** өс бүлмәнән торған фатир; **ко́мната о́тдыха** ял бүлмәһе; **ко́мната ма́тери и ребёнка** әсә менән бала бүлмәһе ♦ **меблиро́ванные ко́мнаты** йыһазландырылған бүлмә (*революцияға тиклем Рәсәйҙә иң арзан ҡунаҡхана төрө*)

**КО́МНАТКА** *ж*; *уменьш. от* **ко́мната**

**КО́МНАТНЫЙ,** -ая, -ое бүлмә …ы; **ко́мнатная дверь** бүлмә ишеге; **ко́мнатные расте́ния** бүлмә үҫемлектәре (гөлдәре) ♦ **ко́мнатная температу́ра** бүлмәләге температура

**КОМО́Д** *м* комод (*шкаф төрө*)

**КОМО́К** *м* төйөрсөк, йомарлаҡ, киҫәк; **бума́жный комо́к** ҡағыҙ төйөрсөк; **комо́к гли́ны** балсыҡ киҫәге ♦ **сжа́ться в комо́к** шоҡрайыу, йомарланыу, бөршәйеү; **сверну́ться в комо́к (комко́м)** *см.* **клубо́к**

**КОМО́ЛЫЙ,** -ая, -ое туҡал; **комо́лая коро́ва** туҡал һыйыр

**КОМПА́КТНОСТЬ** *ж* ыҡсымлыҡ, тығыҙлыҡ, компактлыҡ

**КОМПА́КТНЫЙ,** -ая, -ое ыҡсым, тығыҙ, компактлы, йыйнаҡ; **компа́ктная гру́ппа** компактлы төркөм; **компа́ктный шрифт** тығыҙ шрифт; **компа́ктное изложе́ние** йыйнаҡ итеп хикәйәләү

**КОМПАНЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* аралашыусан, ҡатнашыусан; **он челове́к компане́йский** ул аралашыусан кеше ♦ **на компане́йских нача́лах** бер тигеҙ шарттарҙа

**КОМПА́НИЯ** *ж* **1.** төркөм, компания; **весёлая компа́ния** шат (күңелле) төркөм; **пойти́ на**

**прогу́лку с компа́нией** компания менән йөрөргә сығыу **2.** компания; **акционе́рная компа́ния** акционерҙар компанияһы ♦ **в компа́нии** *с кем берәү менән* бергә, иптәш булып; **за компа́нию**; **для компа́нии** компания өсөн, иптәш булып; **не компа́ния** *кто, кому* компания (иптәш) түгел; **води́ть компа́нию** дуҫ булыу, аралашып йөрөү; **поддержа́ть компа́нию** компанияға ҡушылыу, компанияны күтәреү; **соста́вить компа́нию** *кому* бергә булыу

**КОМПАНЬО́Н** *м* **1.** иптәш, компаньон; **найти́ компаньо́на** иптәш табыу **2.** (*член торговой или промышленной компании*) компаньон

**КОМПА́РТИЯ** *ж* (*коммунистическая партия*) компартия (*коммунистар партияһы*)

**КО́МПАС** *м* компас, ҡибланма; **идти́ по ко́мпасу** ҡибланма буйынса барыу

**КО́МПАСНЫЙ,** -ая, -ое компас ...ы, ҡибланма ...ы; **ко́мпасная стре́лка** ҡибланма уғы (теле); **ко́мпасный курс корабля́** караптың компас буйынса йүнәлеше

**КОМПЕНСАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое компенсация ...ы; **компенсацио́нные сре́дства** компенсация аҡсаһы; **компенсацио́нный ма́ятник** *тех.* компенсация маятнигы

**КОМПЕНСА́ЦИЯ** *ж* компенсация; **де́нежная компенса́ция** аҡсалата компенсация; **компенса́ция поро́ка се́рдца** *мед.* йөрәк ауырыуы компенсацияһы; **компенса́ция ко́мпаса** *тех.* компас компенсацияһы

**КОМПЕНСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** ҡаплау, компенсация биреү; **компенси́ровать убы́тки** зыянды ҡаплау **2.** (*уравновесить*) компенсациялау, тиңләштереү, тигеҙләү

**КОМПЕТЕ́НТНОСТЬ** *ж* **1.** (*осведомлённость*) компетентлыҡ, белдеклелек, белгәнлек; **прояви́ть доста́точную компете́нтность в де́ле** эштә етерлек компетентлыҡ күрһәтеү **2.** (*авторитетность*) нигеҙлелек, төплөлөк; **компете́нтность сужде́ния** фекерҙең нигеҙлелеге **3.** *юр.* (*правомочность*) тулы хоҡуҡлылыҡ; **компете́нтность суде́бного о́ргана** суд органының тулы хоҡуҡлылығы

**КОМПЕТЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** компетентлы, белдекле, үҙ эшен белгән; **компете́нтный врач** үҙ эшен белгән врач **2.** нигеҙле, төплө; **компете́нтное мне́ние** нигеҙле фекер **3.** *юр.* тулы хоҡуҡлы; **компете́нтная организа́ция** тулы хоҡуҡлы ойошма

**КОМПЕТЕ́НЦИЯ** *ж* компетенция (**1.** *кемгәләр яҡшы таныш булған эш йәки фән өлкәһе* **2.** *айырым ойошма йәки кешенең вазифаһында булған эш һәм мәсьәлә*)

**КОМПИЛИ́РОВАТЬ** *несов. что* компиляция яһау, компиляциялау

**КОМПИЛЯТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое компилятив, компиляцияланған; **компиляти́вная статья́** компилятив мәҡәлә

**КОМПИЛЯ́ЦИЯ** *ж* компиляция (**1.** *хеҙмәттең үҙ аллы тикшеренеүҙәр нигеҙендә түгел, бүтән сығанаҡтан алынған мәғлүмәттәр һәм фекерҙәр нигеҙендә яҙылышы* **2.** *шул юл менән яҙылған хеҙмәт*); **занима́ться компиля́цией** компиляция менән шөғөлләнеү

**КО́МПЛЕКС** *м* комплекс; **архитекту́рный ко́мплекс** архитектура комплексы; **сло́жный ко́мплекс** ҡатмарлы комплекс ♦ **ко́мплекс неполноце́нности** кәмселектәр комплексы

**КО́МПЛЕКСНЫЙ,** -ая, -ое комплекслы; **ко́мплексная экспеди́ция** комплекслы экспедиция ♦ **ко́мплексная брига́да** комплекслы бригада (*төрлө профессия кешеләренән торған эш бригадаһы*)

**КОМПЛЕ́КТ** *м* комплект; **компле́кт белья́** эске кейемдәр комплекты; **компле́кт уча́щихся** уҡыусылар комплекты

**КОМПЛЕКТА́ЦИЯ** *ж* комплектлаштырыу; **отде́л комплекта́ции** комплектлаштырыу бүлеге

**КОМПЛЕ́КТНОСТЬ** *ж* комплектлыҡ; **компле́ктность гото́вых изде́лий** әҙер әйберҙәрҙең комплектлығы

**КОМПЛЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое комплектлы; **компле́ктный набо́р** комплектлы йыйылма

**КОМПЛЕКТОВА́НИЕ** *с см.* **комплектова́ть**; **комплектова́ние школ** мәктәптәрҙе комплектлау; **занима́ться комплектова́нием** комплектлау менән шөғөлләнеү

**КОМПЛЕКТОВА́ТЬ** *несов. что* **1.** комплектлау, комплект төҙөү; **комплектова́ть журна́лы** журналдарҙы комплектлау **2.** туплау, тейешле һанға еткереү, комплектлаштырыу; **комплектова́ть библиоте́ку** китапхананы туплау

**КОМПЛЕ́КЦИЯ** *ж* кәүҙә, тән төҙөлөшө, буй-һын, комплекция; **ту́чная компле́кция** һимеҙ кәүҙә

**КОМПЛИМЕ́НТ** *м* маҡтау һүҙе, комплимент; **говори́ть комплиме́нт** маҡтау, маҡтап һүҙ әйтеү

**КОМПОЗИ́ТОР** *м* композитор; **молодо́й компози́тор** йәш композитор

**КОМПОЗИ́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое композитор ...ы, композиторлыҡ ...ы; **компози́торский тала́нт** композитор һәләтлеге

**КОМПОЗИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое композиция ...ы; **композицио́нная те́хника** композиция техникаһы

**КОМПОЗИ́ЦИЯ** *ж* композиция (**1.** *әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәренең төҙөлөшө* **2.** *бер бөтөн төҙөлөшлө әҙәбиәт йәки сәнғәт һ.б. әҫәре* **3.** *муз. музыка әҫәре яҙыу теорияһы*)

**КОМПОНЕ́НТ** *м; книжн.* компонент (*ҡатмарлы нәмәнең бер өлөшө*)

**КОМПОНОВА́ТЬ** *несов. что* ҡорау, ҡораштырыу, туплау; **компонова́ть очередно́й но́мер журна́ла** журналдың сираттағы һанын туплау

**КОМПО́СТ** *м; с.-х.* серетмә; **то́рфо-перегно́йный компо́ст** тиреҫле торф серетмәһе

**КОМПО́СТЕР** *м* компостер, тишкес

**КОМПОСТИ́РОВАТЬ** *несов. что* компостирлау; **компости́ровать железнодоро́жный биле́т** тимер юл билетын компостирлау

**КОМПО́СТНЫЙ,** -ая, -ое серетмә ...ы; **компо́стная ку́ча** серетмә өйөмө; **компо́стное удобре́ние** серетмә ашламаһы

**КОМПО́Т** *м* компот; **компо́т из я́блок** алма компоты

**КОМПРЕ́СС** *м* боҫлама, компресс; **тёплый компре́сс** йылы боҫлама; **поста́вить компре́сс** боҫлама ҡуйыу

**КОМПРЕ́ССНЫЙ,** -ая, -ое боҫлама ...ы, компресс ...ы; **компре́ссная бума́га** боҫлама ҡағыҙы

**КОМПРЕ́ССОР** *м*; *тех.* компрессор (*газ, һауа йәки быу ҡыҫыу машинаһы*); **поршнево́й компре́ссор** поршенлы компрессор

**КОМПРЕ́ССОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** компрессор ...ы; **компре́ссорный заво́д** компрессорҙар эшләү заводы **2.** компрессорлы; **компре́ссорная устано́вка** компрессорлы ҡоролма

**КОМПРОМЕТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* яманат сығарыу, яманатлы итеү, абруй төшөрөү

**КОМПРОМИ́СС** *м* юл ҡуйышып килешеү, компромисс; **пойти́ на компроми́сс** юл ҡуйышып килешеүгә барыу

**КОМПРОМИ́ССНЫЙ,** -ая, -ое килешеп эшләнгән, килешеүле, компромислы; **компроми́ссное реше́ние** юл ҡуйышып, килешеүгә барыу; килешеп эшләнгән ҡарар

**КОМПЬЮ́ТЕР** *м* компьютер (*электронлы машинаның бер атамаһы*); **рабо́тать с компью́тером** компьютер менән эшләү

**КОМСОМО́Л** *м* (*коммунистический союз молодёжи*) комсомол (*коммунистик йәштәр союзы*)

**КОМСОМО́ЛЕЦ** *м* и **КОМСОМО́ЛКА** *ж* комсомол, комсомол ағзаһы

**КОМСОМО́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое комсомол ...ы; **комсомо́льская организа́ция** комсомол ойошмаһы

**КОМСО́РГ** *м* (*комсомольский организатор*) комсорг

**КОМСОСТА́В** *м* команда составы; **комсоста́в полка́** полктың команда составы

**КОМФО́РТ** *м* комфорт, уңайлыҡ; **жить с комфо́ртом** комфорт менән йәшәү

**КОМФОРТА́БЕЛЬНЫЙ** и **КОМФО́РТНЫЙ,** -ая, -ое комфортлы, бөтә уңайлыҡтары булған; **комфорта́бельная гости́ница** комфортлы ҡунаҡхана

**КОН** *м* кон (**1.** *бәкәлсәй, бура һ.б. уйында атҡан әйбер барып төшөргә тейешле урын* **2.** *отош уйынында уйын аҡсаһын ҡуйған урын* **3.** *бер тапҡыр уйналған уйын*); **поста́вить де́ньги на́ кон** аҡсаны конға ҡуйыу; **сыгра́ть оди́н кон** бер кон уйнап алыу ♦ **на кону́** хәүеф өҫтөндә, ҡыл өҫтөндә; **ста́вить на́ кон** *что* ҡурҡыныс хәлгә ҡуйыу

**КОНВЕ́ЙЕР** *м* конвейер; **ле́нточный конве́йер** таҫмалы конвейер ♦ **зелёный конве́йер** йәшел конвейер (*малдарҙы яҙҙан алып көҙгә тиклем йәшел аҙыҡ менән тәьмин итеү системаһы*)

**КОНВЕ́ЙЕРНЫЙ,** -ая, -ое конвейер ...ы; **конве́йерная систе́ма** конвейер системаһы

**КОНВЕ́НТ** *м* конвент (*ҡайһы бер илдәрҙә махсус хоҡуҡ менән һайлана торған закон сығарыусы ойошма*) ♦ **Национа́льный конве́нт** Милли конвент (*беренсе Франция Республикаһында 1792 й. 21 сентябренән алып 1795 й. 26 октябренә тиклем иң юғары һайланма орган*)

**КОНВЕНЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое конвенция ...ы, килешеү ...ы; **конвенцио́нный тари́ф** конвенция тарифы

**КОНВЕ́НЦИЯ** *ж* конвенция, килешеү (*айырым бер мәсьәлә буйынса халыҡ-ара килешеү*); **железнодоро́жная конве́нция** тимер юл конвенцияһы; **заключи́ть конве́нцию** килешеү төҙөү

**КОНВЕРСИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *фин.* конверсия ...ы; **конверсио́нный заём** конверсия заёмы

**КОНВЕ́РСИЯ** *ж*; *фин.* конверсия (**1.** *бер илдең аҡсаһын икенсе илдең аҡсаһына алмаштырыу* **2.** *элек сығарылған дәүләт заёмы шарттарының үҙгәртелеүе* **3.** *оборона сәнәғәтен халыҡ ҡулланыуы тауарҙары сығарыу юлына күсереү*)

**КОНВЕ́РТ** *м* **1.** (*пакет из бумаги*) конверт; **вложи́ть письмо́ в конве́рт** хатты конвертҡа һалыу **2.** (*род одеяла*) конверт; **заверну́ть младе́нца в конве́рт** сабыйҙы конвертҡа урау

**КОНВЕРТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *фин.* конверсиялау, конверсия яһау; **конверти́ровать национа́льную валю́ту** милли валютаны конверсиялау; **конверти́ровать заём** заёмды конверсиялау

**КОНВЕРТИ́РУЕМЫЙ,** -ая, -ое конверсиялана торған, конверсияланмалы; **конверти́руемая валю́та** конверсиялана торған валюта

**КОНВЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое конверт ...ы; **конве́ртная бума́га** конверт ҡағыҙы

**КОНВОИ́Р** *м* **1.** конвойсы, конвой кешеһе **2.** конвоир (*ҡараптарҙы оҙатып барған һаҡсы ҡарап йәки самолёт*)

**КОНВОИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* конвой (һаҡсы төркөм) менән оҙата барыу; **конвои́ровать пле́нных** әсирлеккә төшкәндәрҙе конвой менән оҙата барыу

**КОНВО́Й** *м* һаҡсы төркөм, конвой (**1.** *кем йәки нимәнелер һаҡлап, оҙатып барған төркөм* **2.** *ҡараптарҙы оҙатып барған һаҡсы ҡарап йәки самолёт*)

**КОНВУЛЬСИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое көҙән йыйырғандағы (тартышҡандағы) кеүек, тартышҡаҡ,

конвульсиялы; **конвульси́вные движе́ния па́льцев** бармаҡтарҙың күҙән йыйырғандағы кеүек хәрәкәте

**КОНВУ́ЛЬСИЯ** *ж* күҙән йыйырыу (тартыу), конвульсия; **заби́ться в конву́льсиях** күҙән йыйырыуҙан (тартышыуҙан) ҡалтырап төшөү

**КОНГЕНИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* конгениаль, тура килгән, берҙәй; **перево́д конгениа́лен оригина́лу** тәржемә төп нөсхәһенә тура килә

**КОНГЛОМЕРА́Т** *м* конгломерат (**1.** *кит. төрлө осраҡлы нәмәнең ҡатнашмаһы* **2.** *геол. төрлө таш, ҡырсын, балсыҡ ҡатнашып ҡатҡан тау тоҡомо*)

**КОНГРЕ́СС** *м* конгресс (**1.** *ҙур, гәҙәттә, халыҡ-ара әһәмиәте булған ҡоролтай, кәңәшмә* **2.** *АҠШ-та һәм Латин Америкаһының ҡайһы бер илдәрендә закон сығарыу органы*)

**КОНГРЕССМЕ́Н** *м* конгрессмен, конгресс ағзаһы

**КОНДАЧО́К: с кондачка́** *прост.* аңламайнитмәй, аңламаҫтан, еңел уйлап; **реша́ть вопро́с с кондачка́** мәсьәләне еңел уйлап хәл итеү

**КОНДЕНСА́Т** *м*; *спец.* конденсат (*газдан йәки һыу боҫонан барлыҡҡа килгән шыйыҡса*); **га́зовый конденса́т** газ конденсаты

**КОНДЕНСА́ТОР** *м* конденсатор (**1.** *физ. электр энергияһын туплау ҡорамалы* **2.** *тех. быуҙы һыуға әйләндереү аппараты*)

**КОНДЕНСАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** конденсация ...ы, конденсациялау ..ы, тупланған, йыйылған, туплау ...ы, йыйыу ...ы; **конденсацио́нные устано́вки** конденсация ҡоролмалары **2.** конденсация юлы менән алынған; **конденсацио́нная вода́** конденсация юлы менән алынған һыу

**КОНДЕНСА́ЦИЯ** *ж*; *спец. см.* **конденси́ровать, конденси́роваться**

**КОНДЕНСИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* **1.** туплау, йыйыу; **конденси́ровать эне́ргию** энергия туплау **2.** (*превратить в жидкость*) шыйыҡлыҡҡа (шыйыҡсаға) әйләндереү

**КОНДЕНСИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.*; *спец.* (*сгуститься, стать конденсатом*) ҡуйырыу, конденсатҡа әйләнеү; **пар конденси́руется** боҫ ҡуйыра **2.** *несов. страд. от* **конденси́ровать**

**КОНДИ́ТЕР** *м* кондитер (*татлы ашамлыҡ әҙерләүсе белгес*)

**КОНДИ́ТЕРСКИЙ,** -ая, -ое **1.** кондитер ...ы, татлы (тәм-том); **конди́терские изде́лия** тәм-том ашамлыҡтар **2.** татлы ашамлыҡ, кондитер, тәм-том (әҙерләү, һатыу) ...ы; **конди́терская фа́брика** кондитер (тәм-том) фабрикаһы **3.** *в знач. сущ.* **конди́терская** *ж* татлы ашамлыҡ (тәм-том) магазины, кондитер магазины

**КОНДИЦИОНЕ́Р** *м* кондиционер (*биналарҙа тейешле температура, дымлылыҡ һәм һауа баҫымын тәьмин итеүсе ҡоролма*)

**КОНДИЦИОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *спец.* кондицияға (тейешле сифатҡа) еткереү, кондициялау; **кондициони́ровать во́здух** һауаны кондициялау

**КОНДИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** кондицияға (тейешле сифаты булған) ярашлы, кондициялы; **кондицио́нные това́ры** тейешле сифаты булған тауарҙар; **кондицио́нное зерно́** кондициялы орлоҡ **2.** кондициялау ...ы; **кондицио́нная устано́вка** кондициялау ҡоролмаһы

**КОНДИ́ЦИЯ** *ж*; *спец.* кондиция (*ниҙең дә булһа сифатына ҡарата ҡуйылған талап нормаһы*); **конди́ция зерна́** ашлыҡ кондицияһы

**КОНДО́ВЫЙ** и **КО́НДОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** таҙа үҙағаслы, ныҡ үҙағаслы; **кондо́вый лес** ныҡ (таҙа) үҙағаслы урман **2.** *перен.* борондан килгән, боронғо, тәүге; **кондо́вое купе́чество** боронғо сауҙагәрлек

**КО́НДОР** *м* кондор (*ҡош*)

**КОНДОТЬЕ́Р** *м* кондотьер (*урта быуаттарҙа Италияла аҡсаға ялланған хәрби төркөм башлығы*)

**КОНДРА́ШКА: кондра́шка хвати́л (сту́кнул, пришиб и т.п.)** *кого*; *прост.* быумаһы тотто

**КОНДУ́КТОР** *м* кондуктор

**КОНДУ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое кондуктор ...ы; **конду́кторская брига́да** кондуктор(ҙар) бригадаһы

**КОНЕВО́Д** *м* йылҡысы

**КОНЕВО́ДСТВО** *с* йылҡысылыҡ; **занима́ться конево́дством** йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеү

**КОНЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое йылҡысылыҡ ...ы; **конево́дческая фе́рма** йылҡысылыҡ фермаһы

**КОНЁК I** *м* **1.** *уменьш.-ласк. от* **конь** 1; **2.** *перен.* һөйләргә яратҡан нәмә; **говори́ть об э́том — его́ люби́мый конёк** был турала һөйләшеү — уның яратҡан нәмәһе (темаһы) **3.** (*гребень крыши*) атлама; **высо́кий конёк** бейек атлама **4.** (*резное украшение*) атсыҡ, бәләкәс ат; **резно́й конёк** семәрле атсыҡ ♦ **морско́й конёк** *зоол.* ат-баш балыҡ; **сесть на своего́ (люби́мого) конька́; оседла́ть своего́ конька́** үҙе яратҡан темаға әңгәмә башлау

**КОНЁК II** *м см.* **коньки́**

**КОНЕ́Ц** *м* **1.** ос, сик; **коне́ц верёвки** бау осо; **коне́ц доро́ги** юл сиге **2.** аҙаҡ, ахыр, бөтөү; **коне́ц го́да** йыл аҙағы; **коне́ц дня** көн аҙағы; **рабо́та подхо́дит к концу́** эш бөтөүгә бара **3.** *перен.* үлем, бөтөү; **тут ему́ и коне́ц** шуның менән ул үлеп китте **4.** *разг.* яҡ; **в о́ба конца́ я шёл пешко́м** ике яҡҡа ла йәйәү барҙым **5.** *мор.* арҡан, канат; **прича́льный коне́ц** причал арҡаны **6.** *мн.* **концы́**; *спец.* (*обрезки ткани, верёвок*) киҫенте, ҡырҡынды ♦ **без конца́** туҡтауһыҙ, осһоҙҡырыйһыҙ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ; **до конца́** аҙағына тиклем, тулыһынса; **под коне́ц** ахырҙа, ниһайәт;



16 зак. 2.0084.05

**из конца́ в коне́ц** бер башынан икенсеһенә; **оди́н коне́ц** барыбер ҡотолоп булмаҫ; **во все концы́** бөтә яҡҡа; **до побе́дного конца́** еңгәнгә тиклем; **на худо́й коне́ц** һис юғында, һис тә булмаһа; **со всех концо́в** бөтә яҡтан; **в конце́ концо́в** ахыр сиктә; **нет конца́** *чему* осһоҙ-ҡырыйһыҙ; **конца́-кра́ю (кра́я) нет** осо-ҡырыйы күренмәй; **(и) концы́ в во́ду** эҙе-юлы юҡ, эҙе лә ҡалмаған; **концо́в не найти́** эҙенә төшөп булмай; **па́лка о двух конца́х** ниҙеңдер яҡшы яғы ла, насар яғы ла бар, таяҡ ике башлы; **положи́ть коне́ц** *чему* сик ҡуйыу, туҡтатыу; **свести́ концы́ с конца́ми** тура килтереү, осон осҡа ялғау; **концы́ с конца́ми не схо́дятся** тап килмәй

**КОНЕ́ЧНО 1.** *вводн. сл.* әлбиттә, билдәле; **он, коне́чно, прав** ул, әлбиттә, хаҡлы **2.** *частица; разг.* (*в значении "да, разумеется"*) әлбиттә; **вы лю́бите му́зыку? — Коне́чно** һеҙ музыка яратаһығыҙмы? — Әлбиттә

**КОНЕ́ЧНОСТИ** *мн.* (*ед.* **коне́чность** *ж*) (*у человека*) аяҡ-ҡул, ослоҡ; (*у животных и насекомых*) аяҡ, һан; **пере́дние коне́чности** ал(ғы) һан

**КОНЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сикле, сиге булған; **жизнь коне́чна, а вре́мя бесконе́чно** ғүмер сикле, ә ваҡыт сикһеҙ **2.** (*последний*) һуңғы, аҙаҡҡы; **коне́чная ста́нция** һуңғы станция **3.** һуңғы, төп; **коне́чный результа́т** төп һөҙөмтә ♦ **в коне́чном счёте** ахыр сиктә

**КОНИ́НА** *ж* йылҡы ите

**КОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** конус ...ы; **кони́ческая пове́рхность** конус йөҙө **2.** (*имеющий форму конуса*) конус рәүешле (рәүешендәге); **кони́ческая кры́ша** конус рәүешендәге ҡыйыҡ

**КОНКРЕТИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **конкретизи́ровать**

**КОНКРЕТИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* конкретлаштырыу, аныҡлау, асыҡлау

**КОНКРЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое конкрет, аныҡ, билдәле; **конкре́тный приме́р** конкрет миҫал

**КОНКУРЕ́НТ** *м* и **КОНКУРЕ́НТКА** *ж* конкурент, көнәркәш

**КОНКУРЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое конкуренция, көнәркәшлек; **конкуре́нтная борьба́** көнәркәшлек көрәше

**КОНКУРЕНТОСПОСО́БНОСТЬ** *ж* конкуренцияға (көнәркәшлеккә) һәләтлек; **конкурентоспосо́бность предприя́тий** предприятиеларҙың көнәркәшлек һәләтлеге

**КОНКУРЕНТОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое конкуренцияға (көнәркәшлеккә) һәләтле; **конкурентоспосо́бные фи́рмы** конкуренцияға һәләтле фирмалар

**КОНКУРЕ́НЦИЯ** *ж* конкуренция, көнәркәшлек ♦ **вне конкуре́нции** тиңе юҡ, сағыштырғыһыҙ яҡшы

**КОНКУРИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** конкурентлыҡ (көнәркәшлек) итеү, көнәркәшеү, конкуренция алып барыу; **э́ти два теа́тра конкури́руют ме́жду собо́й** был ике театр үҙ-ара конкуренция алып бара; **э́ти две промы́шленные фи́рмы конкури́руют ме́жду собо́й** был ике сәнәғәт фирмаһы үҙ-ара конкурентлыҡ итә **2.** *перен.* (*не уступать*) ҡалышмау, тиң булыу

**КО́НКУРС** *м* конкурс; **ко́нкурс кураи́стов** ҡурайсылар конкурсы; **пода́ть рабо́ту на ко́нкурс** эште конкурсҡа тапшырыу; **пройти́ по ко́нкурсу** конкурс буйынса (конкурстан) үтеү

**КОНКУРСА́НТ** *м* и **КОНКУРСА́НТКА** *ж* конкурста ҡатнашыусы

**КО́НКУРСНЫЙ,** -ая, -ое конкурс ...ы; **ко́нкурсные экза́мены** конкурс имтихандары; **ко́нкурсное сочине́ние** конкурс иншаһы

**КО́ННИК** *м* атлы ғәскәр

**КОННОЗАВО́ДСТВО** *с* йылҡы үрсетеү заводы

**КО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ат ...ы, йылҡы ...ы; **ко́нные ска́чки** ат сабышы; **ко́нная я́рмарка** йылҡы йәрминкәһе; **ко́нная доро́га** ат юлы **2.** (*приводимый в движение конями*) атлы, ат менән; **ко́нная молоти́лка** ат молотилкаһы; **ко́нная тя́га** ат көсө менән; **ко́нная коси́лка** ат косилкаһы **3.** һыбайлы, атлы; **ко́нная а́рмия** атлы ғәскәр ♦ **ко́нный заво́д** йылҡы үрсетеү заводы

**КОНОВА́Л** *м* йылҡы имсеһе (дауалаусыһы)

**КОНОВО́Д** *м* ат ҡараусы

**КО́НОВЯЗЬ** *ж* **1.** ат бәйләү урыны (бағанаһы) **2.** ат бәйләгес (*көтөүлектә ат тояғын бәйләү өсөн бау*)

**КОНОКРА́Д** *м* ат ҡарағы

**КОНОПА́ТИТЬ** *несов. что* (*паклей, пенькой*) һыҙлыҡлау; (*мхом*) мүкләү; **конопа́тить избу́** өйҙө мүкләү; **конопа́тить ще́ли** ярыҡтарҙы һыҙлыҡлау

**КОНОПА́ТЫЙ,** -ая -ое *разг.* (*веснушчатый*) һипкелле; (*рябой*) шаҙра

**КОНОПЛЯ́** *ж* киндер, тарма

**КОНОПЛЯ́НИК** *м* киндер (тарма) сәселгән ер, тармалыҡ, киндер (тарма) баҫыуы

**КОНОПЛЯ́НКА** *ж* киндер турғайы

**КОНОПЛЯ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** киндер (тарма); **конопля́ное се́мя** киндер орлоғо **2.** киндер, киндер ...ы, киндерҙән; **конопля́ная пря́жа** киндер еп; **конопля́ное ма́сло** киндер майы

**КОНСЕРВАТИ́ВНОСТЬ** *ж* консерваторлыҡ; **консервати́вность взгля́дов** ҡараш консерваторлығы

**КОНСЕРВАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иҫке ҡарашлы, консерватив; **консервати́вный челове́к** иҫке ҡарашлы кеше **2.** *мед.* консерватив (*хирургия ысулы ҡулланмай*); **консервати́вные ме́тоды лече́ния** дауаларҙың консерватив ысулдары

**КОНСЕРВАТИ́ЗМ** *м* консервативлыҡ, консерватизм; **консервати́зм мышле́ния** фекерләүҙең консервативлығы

**КОНСЕРВА́ТОР** *м* **1.** консерватор, иҫке ҡарашлы (*кеше*) **2.** *полит.* консерватор (*консерватив сәйәси фирҡә ағзаһы*)

**КОНСЕРВАТО́РИЯ** *ж* консерватория (*юғары музыка уҡыу йорто*); **око́нчить консервато́рию** консерватория тамамлау

**КОНСЕРВА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое консерватор ...ы; **консерва́торские при́нципы** консерватор принциптары

**КОНСЕРВАТО́РСКИЙ,** -ая, -ое консерватория ...ы; **консервато́рское образова́ние** консерватория белеме

**КОНСЕРВА́ЦИЯ** *ж см.* **консерви́ровать** 2, 3

**КОНСЕРВИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** консервалау; **консерви́ровать огурцы́** ҡыяр консервалау **2.** *спец.* боҙолоуҙан (сереүҙән) һаҡлау; **консерви́ровать археологи́ческие нахо́дки** археологик табыштарҙы боҙолоуҙан һаҡлау **3.** туҡтатып тороу, ваҡытлыса туҡтатыу; **консерви́ровать заво́д** заводты туҡтатып тороу

**КОНСЕ́РВНЫЙ,** -ая, -ое консерва ...ы; **консе́рвный нож** консерва бысағы

**КОНСЕ́РВЫ** *мн.* консерва; **овощны́е консе́рвы** йәшелсә консерваһы

**КОНСИ́ЛИУМ** *м* консилиум (*ауырыуҙы дауалау юлдарын билдәләү тураһында табиптар кәңәшмәһе*); **созва́ть конси́лиум** консилиум йыйыу; **реше́ние конси́лиума** консилиум ҡарары

**КОНСИСТЕ́НЦИЯ** *ж; спец.* консистенция (*шыйыҡ һәм ярым ҡаты матдәләрҙең тығыҙлыҡ, йомшаҡлыҡ, ҡатылыҡ, ҡуйылыҡ дәрәжәһе*)

**КО́НСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* ат ...ы; **ко́нский во́лос** ат ҡылы; **ко́нский то́пот** ат (тояғының) тыҡылдауы; **с ко́нскую го́лову** ат башындай; **с ко́нский глаз** ат күҙендәй; **ко́нский щаве́ль** *бот.* атҡолаҡ, ат ҡуҙғалағы; **ко́нские бобы́** *бот.* ат борсағы

**КОНСОЛИДА́ЦИЯ** *ж; книжн., фин. см.* **консолиди́ровать, консолиди́роваться**

**КОНСОЛИДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** *книжн.* консолидациялау, бергә туплап нығытыу; **консолиди́ровать все си́лы борцо́в за мир** тыныслыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең бар көстәрен бергә туплап нығытыу **2.** *фин.* ваҡытын оҙайтыу (*ҡыҫҡа ваҡытҡа алынған дәүләт йөкләмәләрен түләүҙе кисектереү*); **консолиди́ровать за́ймы** заёмдарҙың түләү ваҡытын оҙайтыу

**КОНСОЛИДИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.; книжн.* консолидацияланыу, тупланып нығыныу **2.** *несов. страд. от* **консолиди́ровать**

**КОНСО́ЛЬ** *ж; архит.* консоль (*йорттоң стенаһынан сығарыбыраҡ эшләнгән ҡулайлама*), терәткес

**КОНСОНА́НС** *м* консонанс, аһәңдәшлек (**1.** *муз. бер нисә тауыштың үҙ-ара ярашыуы* **2.** *әҙ. баҫым төшкән төрлө һуҙынҡы өндәрҙән торған рифма*)

**КОНСОНАНТИ́ЗМ** *м; лингв.* консонантизм, тартынҡы өндәр системаһы; **консонанти́зм башки́рского языка́** башҡорт теленең тартынҡы өндәр системаһы

**КОНСО́РЦИУМ** *м; эк.* консорциум (*бер нисә банкының йәки сәнәғәт компанияларының эште бергә башҡарыу уйы менән ваҡытлыса килешеүе*)

**КОНСПЕ́КТ** *м* конспект; **конспе́кт кни́ги** китаптың конспекты; **соста́вить конспе́кт** конспект төҙөү

**КОНСПЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое конспект рәүешендәге (кеүек); **конспекти́вное изложе́ние** конспект рәүешендә тәфсир итеү

**КОНСПЕКТИ́РОВАТЬ** *несов. что* конспектлау, конспект (яҙыу) төҙөү; **конспекти́ровать статью́** мәҡәләнең конспектын төҙөү

**КОНСПИРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое йәшерен, конспирациялы; **конспирати́вная организа́ция** йәшерен ойошма

**КОНСПИРА́ТОР** *м* йәшерен эш итеүсе, конспиратор

**КОНСПИРА́ЦИЯ** *ж* конспирация (*эшмәкәрлеген һәм ағзаларын сер итеп һаҡлау өсөн йәшерен ойошма тарафынан ҡулланылған эш ысулы*); **соблюда́ть конспира́цию** конспирация һаҡлау

**КОНСПИРИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** конспирация һаҡлау (*ҡулланыу*); **проти́вник конспири́рует** дошман конспирация ҡуллана (йәшерен эш итә) **2.** *что* йәшерен эш итеү, сер тотоу, конспирациялау; **конспири́ровать докуме́нты** документтар менән йәшерен эш итеү

**КОНСТА́НТНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* даими, үҙгәрмәй торған, констант; **конста́нтные фо́рмы** даими формалар

**КОНСТАТА́ЦИЯ** *ж см.* **констати́ровать**

**КОНСТАТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* күрһәтеү, билдәләү, күрһәтеп (әйтеп, билдәләп) үтеү; **констати́ровать факт** фактты билдәләп үтеү

**КОНСТИТУИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что; книжн.* билдәләү, асыҡлау; **конституи́ровать причи́нность** сәбәбен билдәләү

**КОНСТИТУЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** конституция ...ы, конституцион; **конституцио́нный зако́н** конституция законы **2.** конституциялы; **конституцио́нное госуда́рство** конституциялы дәүләт ♦ **конституцио́нная мона́рхия** конституциялы монархия (*монарх власын конституция менән сикләүҙәр индергән дәүләт короллошо*)

**КОНСТИТУ́ЦИЯ** *ж* **1.** конституция; **Конститу́ция РБ** БР Конституцияһы **2.** кәүҙә төҙөлөшө, төҙөлөш, ҡоролош, килбәт; **конститу́ция челове́ка** кешенең кәүҙә төҙөлөшө; **конститу́ция органи́зма** организм төҙөлөшө

**КОНСТРУИ́РОВАТЬ** *несов. что* **1.** конструкция төҙөү (ҡороу); **конструи́ровать радио-**

**приёмник** радиоалғыс конструкцияһын төҙөү **2.** барлыҡҡа килтереү, төҙөү; **конструи́ровать прави́тельство** хөкүмәт төҙөү

**КОНСТРУКТИВИ́ЗМ** *м* конструктивизм (*әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендә XX б. барлыҡҡа килгән формалистик йүнәлеш*)

**КОНСТРУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** конструктив, төҙөлөш …ы; **конструкти́вные осо́бенности зда́ния** бинаның төҙөлөш үҙенсәлектәре **2.** эшлекле, нигеҙ булырға яраҡлы, конструктив; **конструкти́вное предложе́ние** эшлекле тәҡдим

**КОНСТРУ́КТОР** *м* конструктор (**1.** *конструкциялар төҙөүсе* **2.** *төҙөп уйнау өсөн деталдәр йыйылмаһы*); **гла́вный констру́ктор** баш конструктор; **де́тский констру́ктор** балалар конструкторы; **купи́ть констру́ктор** конструктор һатып алыу

**КОНСТРУ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое конструктор(ҙар) …ы; **констру́кторское бюро́** конструкторҙар бюроһы

**КОНСТРУ́КЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* конструкция, ҡоролош; **самолёт но́вой констру́кции** яңы ҡоролошло самолёт; **констру́кция моста́** күпер конструкцияһы; **железобето́нная констру́кция** тимер-бетон конструкция; **граммати́ческая констру́кция** грамматик конструкция

**КО́НСУЛ** *м* консул (**1.** *дип. ил мәнфәғәтен һаҡлау өсөн икенсе илгә ебәрелгән рәсми кеше* **2.** *тар. ҡайһы бер илдәрҙә юғары хөкүмәт кешеләре исеме*); **генера́льный ко́нсул** генераль консул; **вое́нный ко́нсул** хәрби консул

**КО́НСУЛЬСКИЙ,** -ая, -ое консуллыҡ …ы, консул …ы; **ко́нсульские полномо́чия** консул хоҡуҡтары; **ко́нсульские представи́тели** консуллыҡ вәкилдәре

**КО́НСУЛЬСТВО** *с*; *в разн. знач.* консуллыҡ; **генера́льное ко́нсульство** генераль консуллыҡ

**КОНСУЛЬТА́НТ** *м* консультант, консультация биреүсе; **нау́чный консульта́нт** ғилми консультант

**КОНСУЛЬТАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое консультатив, кәңәш биреүгә хоҡуҡлы; **консультати́вный о́рган** консультатив орган

**КОНСУЛЬТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое консультация …ы, кәңәшмә …ы; **консультацио́нное бюро́** консультация бюроһы; **консультацио́нный зал** кәңәшмә залы

**КОНСУЛЬТА́ЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* консультация, кәңәш; **юриди́ческая консульта́ция** юридик консультация; **расписа́ние консульта́ций** консультациялар расписаниеһы; **получи́ть консульта́цию** кәңәш алыу

**КОНСУЛЬТИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.* консультация биреү (үткәреү); **консульти́ровать студе́нта** студентҡа консультация биреү

**КОНСУЛЬТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. с кем* консультация алыу; **консульти́роваться со специали́стом** белгестән консультация алыу

**КОНТА́КТ** *м* **1.** *тех.* контакт (*электр сымының тоташҡан урыны һәм тоташыу өсөн ҡулланылған ҡорал*) **2.** туранан-тура бәйләнеш, контакт; **экономи́ческие конта́кты** иҡтисади бәйләнештәр; **быть в конта́кте** бәйләнештә булыу; **вступи́ть в конта́кт** *с кем-л. берәйһе менән* контакт урынлаштырыу (контактҡа инеү)

**КОНТАКТИ́РОВАТЬСЯ** *сов., несов.*; *разг.* туранан-тура бәйләнешкә кереү, мөнәсәбәткә (контактҡа) инеү

**КОНТА́КТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** контактлы; **конта́ктный про́вод** контактлы сым **2.** бәйләнешкә ингән; **конта́ктный больно́й** бәйләнешкә ингән ауырыу **3.** *разг.* тығыҙ бәйләнеш, аралашыу еңел

**КОНТЕ́ЙНЕР** *м* контейнер (*йөк ташыу өсөн ҡулланылған йәшник*); **железнодоро́жный конте́йнер** тимер юл контейнеры

**КОНТЕ́КСТ** *м* контекст (*яҙма телмәрҙең тамамланған тулы мәғәнәле бер өлөшө*); **широ́кий конте́кст** киң контекст

**КОНТИНГЕ́НТ** *м* контингент (**1.** *кит. бер эш тирәһендә тупланған кешеләр төркөмө* **2.** *махс. ҡуйылған сик, норма*); **континге́нт уча́щихся** уҡыусылар контингенты; **континге́нт строи́тельных материа́лов** төҙөлөш материалдары контингенты

**КОНТИНЕ́НТ** *м* континент, ҡитға; **путеше́ствовать по контине́нтам** континент буйлап гиҙеү; **еврази́йский контине́нт** Евразия ҡитғаһы

**КОНТИНЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое континенталь (ҡитға) …ы; **континента́льные ре́ки** ҡитға йылғалары ♦ **континента́льный кли́мат** континенталь климат

**КОНТО́РА** *ж* контора; **конто́ра свя́зи** элемтә контораһы

**КОНТО́РКА** *ж* конторка (**1.** *бейек эш өҫтәле* **2.** *цех башлығының, мастерҙың һ.б. бәләкәй генә бүлмәһе*)

**КОНТО́РСКИЙ,** -ая, -ое контора …ы; **конто́рские слу́жащие** контора хеҙмәткәрҙәре; **конто́рское помеще́ние** контора бүлмәһе

**КОНТРАБА́НДА** *ж* контрабанда (**1.** *тыйылған йәки һалым һалынған тауарҙың дәүләт сиге аша йәшерен үткәрелеүе* **2.** *шул юл менән үткәрелгән тауар*)

**КОНТРАБАНДИ́СТ** *м* контрабандасы

**КОНТРАБА́НДНЫЙ,** -ая, -ое контрабанда …ы; **контраба́ндный това́р** контрабанда тауары

**КОНТРАБА́С** *м*; *муз.* контрабас (*ҡыллы музыка ҡоралы*)

**КОНТРАГЕ́НТ** *м*; *спец.* контрагент (*килешеүҙә ҡатнашып, унда билдәләнгән йөкләмәләрҙе үҙ өҫтөнә алған кеше йәки ойошма*)

**КОНТР-АДМИРА́Л** *м* контр-адмирал

**КОНТРА́КТ** *м* контракт, килешеү; **заключи́ть контра́кт** контракт төҙөү

**КОНТРАКТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое контрактация ...ы; **контрактацио́нный догово́р** контрактация килешеүе

**КОНТРАКТА́ЦИЯ** *ж* контрактация (**1.** *берәй нәмәне билдәле бер ваҡытта һәм билдәле шарттарҙа алыу йәки файҙаланыу өсөн килешеү төҙөү* **2.** *алдан төҙөлгән килешеү буйынса ауыл хужалығы аҙыҡтарын әҙерләү тәртибе*); **контракта́ция зерна́** игенгә контрактация

**КОНТРАКТОВА́ТЬ** *несов. кого-что* контракт (килешеү) төҙөү, контрактлау; **контрактова́ть урожа́й** уңышҡа контракт төҙөү; **контрактова́ть рабо́чих** эшселәрҙе контрактлау

**КОНТРА́ЛЬТО** **1.** *с нескл.* контральто (*йырсы ҡатын-ҡыҙҙарҙағы иң ҡалын тауыш*) **2.** *ж нескл.* контральто (*шундай тауышлы йырсы ҡатын-ҡыҙ*)

**КОНТРАМА́РКА** *ж* контрамарка (*театрға, киноға һ.б. түләүһеҙ инеү өсөн бирелә торған талон*)

**КОНТРАПУ́НКТ** *м*; *муз.* контрапункт (**1.** *үҙ аллы яңғырай торған бер нисә көйҙө ҡушып, бер бөтөн итеп яңғыратыу оҫталығы* **2.** *музыка теорияһы бүлеге*)

**КОНТРА́СТ** *м* контраст, ҡапма-ҡаршылыҡ; **цветовы́е контра́сты** төҫтәр контрасы; **ре́зкий контра́ст** киҫкен ҡапма-ҡаршылыҡ

**КОНТРАСТИ́РОВАТЬ** *несов. с кем-чем* ҡапма-ҡаршы (булыу), ҡапма-ҡаршы килеп тороу, контраслана; **чёрный цвет хорошо́ контрасти́рует с бе́лым** ҡара төҫ аҡҡа ҡапма-ҡаршы

**КОНТРА́СТНЫЙ,** -ая, -ое контраслы, контраст, ҡапма-ҡаршы; **контра́стные явле́ния** контраст күренештәр; **контра́стный фотосни́мок** контраслы фотоһүрәт

**КОНТРАТА́КА** *ж* ҡаршы атака, ҡаршы һөжүм, контратака; **контрата́ка врага́** дошмандың ҡаршы һөжүме

**КОНТРАТАКОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* контратакалау, ҡаршы атака (һөжүм) яһау; **контратакова́ть проти́вника** дошманға ҡаршы атака яһау

**КОНТРИБУ́ЦИЯ** *ж* контрибуция (*еңелгән илдән еңгән илгә (дәүләткә) түләнә торған аҡса йәки мөлкәт*)

**КОНТРМАНЁВР** *м*; *воен.* ҡаршы манёвр, контрманёвр (*манёврға ҡаршы манёвр*)

**КОНТРНАСТУПЛЕ́НИЕ** *с* ҡаршы һөжүм, контрһөжүм

**КОНТРОЛЁР** *м* контролёр, контроль яһаусы

**КОНТРОЛИ́РОВАТЬ** *несов. кого-что* тикшереү, контроль яһау; **контроли́ровать рабо́ту** *чью-л. берәйһенең* эшенә контроль яһау

**КОНТРО́ЛЬ** *м* контроль, тикшереү, күҙәтеү; **обще́ственный контро́ль** йәмәғәт контроле; **госуда́рственный контро́ль** дәүләт контроле; **взять под контро́ль** контролгә (күҙәтеү аҫтына) алыу; **поста́вить контро́ль у вхо́да** кергән ергә контроль ҡуйыу

**КОНТРО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** контроль ...ы, тикшереү ...ы, күҙәтеү ...ы; **контро́льные о́рганы** контроль органдары **2.** контроль; **контро́льная рабо́та** контроль эш ♦ **контро́льные ци́фры** контроль һандар

**КОНТРРАЗВЕ́ДКА** *ж* контрразведка; **све́дения контрразве́дки** контрразведка мәғлүмәттәре

**КОНТРРАЗВЕ́ДЧИК** *м* контрразведка хеҙмәткәре, контрразведчик; **о́пытный контрразве́дчик** тәжрибәле контрразведчик

**КОНТРРЕВОЛЮЦИОНЕ́Р** *м* контрреволюционер

**КОНТРРЕВОЛЮЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое контрреволюцион, контрреволюция ...ы; **контрреволюцио́нные организа́ции** контрреволюцион ойошмалар

**КОНТРРЕВОЛЮ́ЦИЯ** *ж* контрреволюция

**КОНТРУДА́Р** *м* ҡаршы һөжүм; **нанести́ врагу́ контруда́р** дошманға ҡаршы һөжүм итеү

**КОНТУ́ЗИТЬ** *сов. кого* контузия булыу; **его́ конту́зило в го́лову** башына контузия булған

**КОНТУ́ЗИЯ** *ж* контузия (*организмдың тыштан яраланмайынса шаңҡып имгәнеүе*); **получи́ть конту́зию** контузия алыу

**КО́НТУР** *м* контур (*берәй нәмәнең тышҡы һыҙаты*); **чёткие ко́нтуры го́рода** ҡаланың аныҡ контуры

**КО́НТУРНЫЙ,** -ая, -ое контурлы, контур ...ы; **ко́нтурный рису́нок** контурлы һүрәт ♦ **ко́нтурная ка́рта** контурлы карта (*атамаһы яҙылмайынса, контуры буйынса атамаһын таба торған*); **ко́нтурная ли́ния** контурлы һыҙыҡ (*нөктәләр менән генә билдәләнгән һыҙыҡ*)

**КОНУРА́** *ж*; *прям., перен.* эт ояһы

**КО́НУС** *м* конус; **усечённый ко́нус** киҫек конус; **ко́нус горы́** тау конусы

**КО́НУСНЫЙ,** -ая, -ое **1.** конус ...ы; **ко́нусная пове́рхность** конус йөҙө **2.** конус һымаҡ (рәүешле); **ко́нусная вту́лка** конус рәүешле втулка

**КОНУСОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое конус рәүешле, конусҡа оҡшаған

**КОНФЕДЕРА́ЦИЯ** *ж* конфедерация (**1.** *ниндәй ҙә булһа ойошмалар берекмәһе* **2.** *үҙ аллы дәүләттәр берекмәһе*); **Всеми́рная конфедера́ция труда́** Бөтә донъя хеҙмәт конфедерацияһы

**КОНФЕРА́НС** *м* конферанс, сығыш (*сәхнәлә берәй эстрада программаһы менән сығыш һәм шул сығыштың тексы*)

**КОНФЕРАНСЬЕ́** *м нескл.* конферансье (*концерт алып барыусы артист*)

**КОНФЕРЕ́НЦ-ЗА́Л** *м* конференц-зал (*тантаналы йыйылыш, конференция үткәреү залы*)

**КОНФЕРЕ́НЦИЯ** *ж* конференция, кәңәшмә; **нау́чная конфере́нция** ғилми конференция

**КОНФЕ́ТА** *ж* кәнфит; **шокола́дные конфе́ты** шоколадлы кәнфит

**КОНФЕ́ТНИЦА** *ж* кәнфит һауыты

**КОНФЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое кәнфит ...ы; **конфе́тная обёртка** кәнфит ҡағыҙы

**КОНФЕТТИ́** *с нескл.* конфетти, ҡағыҙ тәңкәләр (*һибеү өсөн төрлө төҫтәге ҡағыҙ*)

**КОНФИГУРА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* конфигурация (**1.** *берәй нәмәнең тышҡы күренеше, тышҡы рәүеше* **2.** *төрлө нәмәнең үҙ-ара урынлашыу тәртибе*); **конфигура́ция морски́х берего́в** диңгеҙ ярҙарының конфигурацияһы; **конфигура́ция звёзд** йондоҙҙар конфигурацияһы

**КОНФИДЕНЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* йәшерен, сер итеп һаҡлана торған, конфиденциаль; **конфиденциа́льный разгово́р** сер итеп һаҡлана торған һөйләшеү

**КОНФИСКА́ЦИЯ** *ж* конфискация (**1.** *шәхси милектең көслөк менән дәүләт файҙаһына түләүһеҙ алыныуы* **2.** *матбуғатта сыҡҡан баҫманың тейешле дәүләт органдары тарафынан таратмай, бикләп алыныуы*)

**КОНФИСКОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* конфискациялау, конфискация яһау (үткәреү); **конфискова́ть иму́щество** милекте конфискациялау

**КОНФИТЮ́Р** *м* конфитюр (*джем төрө*)

**КОНФЛИ́КТ** *м* конфликт (**1.** *ҡапма-ҡаршы яҡ, фекер, көстәр араһындағы ҡаршылыҡ* **2.** *халыҡ-ара мөнәсәбәттә көсөргәнешле хәл*); **вступи́ть в конфли́кт** конфликтҡа инеү; **избежа́ть конфли́кта** конфликттан (ҡасыу) һаҡланыу; **вое́нный конфли́кт** хәрби конфликт; **урегули́рование междунаро́дных конфли́ктов** халыҡ-ара конфликттарҙы яйға һалыу

**КОНФЛИ́КТНЫЙ,** -ая, -ое конфликтлы, бәхәсле; **конфли́ктный вопро́с** бәхәсле мәсьәлә; **разбо́р конфли́ктного де́ла** конфликтлы эште тикшереү ♦ **конфли́ктная поли́тика** конфликтлы сәйәсәт; **конфли́ктная коми́ссия** конфликт комиссияһы (*хакимиәт менән хеҙмәтсәндәр араһындағы конфликтты тикшереү комиссияһы*)

**КОНФЛИКТОВА́ТЬ** *несов. с кем-л.*; *разг.* конфликтҡа инеү, низағлашыу, бәхәсләшеү; **конфликтова́ть с сосе́дом** күрше менән низағлашыу

**КОНФО́РКА** *ж* камфарка (**1.** *сәйнүк ултыртыу өсөн самауыр мөрйәһенә кейҙерелә торған селтәрле ҡалпаҡ* **2.** *газ плитаһында өҫтөнә кәстрүл, таба һ.б. ултыртыу өсөн тәғәйенләнгән түңәрәк*)

**КОНФРОНТА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* конфронтация, бәрелеш, ҡапма-ҡаршылыҡ; **поли́тика конфронта́ции** конфронтация сәйәсәте

**КОНФУ́З** *м* уңайһыҙ хәл, аптыраш, конфуз; **неожи́данный конфу́з** көтөлмәгән уңайһыҙ хәл

**КОНФУ́ЗИТЬ** *несов. кого* аптырашҡа (уңайһыҙ хәлгә) ҡалдырыу

**КОНФУ́ЗИТЬСЯ** *несов.* аптырау, тартыныу, оялыу, уңайһыҙланыу; **при посторо́нних ма́льчик всегда́ конфу́зится** сит кешеләр алдында малай һәр ваҡыт уңайһыҙлана

**КОНФУ́ЗЛИВЫЙ,** -ая, -ое оялсан, тартыныусан, уңайһыҙланыусан; **конфу́зливый челове́к** оялсан кеше; **конфу́зливый вид** оялсан ҡиәфәт

**КОНФУ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* оятҡа ҡалдырырлыҡ, уңайһыҙ хәлгә ҡалдырырлыҡ, ҡыҙартырлыҡ; **конфу́зная неожи́данность** оятҡа ҡалдырырлыҡ көтөлмәгән хәл

**КОНЦЕНТРА́Т** *м* концентрат (**1.** *тиҙ генә әҙерләү өсөн махсус эшкәртеп, киптерелгән аҙыҡ* **2.** *а.-х. туҡлыҡлы мал аҙығы* **3.** *тау. байыҡтырылған мәғдән*)

**КОНЦЕНТРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое концентрация ...ы, концентрацион; **концентрацио́нный ла́герь** концентрацион лагерь (*тотҡондарҙы ябыу урыны*)

**КОНЦЕНТРА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см* **концентри́ровать** 1, 3, 4, **концентри́роваться** 1, 3, 4; **2.** *хим.* концентрация, концентрациялы; **раство́р высо́кой концентра́ции** юғары концентрациялы иретмә

**КОНЦЕНТРИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **концентри́ровать** **2.** *прил.* йүнәлдерелгән, тупланған; **концентри́рованное внима́ние** йүнәлдерелгән иғтибар; **концентри́рованные си́лы врага́** дошмандың тупланған көстәре **3.** *прил.* тулы, бай йөкмәткеле; **концентри́рованная информа́ция** тулы мәғлүмәт **4.** *прил.*; *с.-х.* туҡлыҡлы, туйындырылған; **концентри́рованные корма́** туҡлыҡлы аҙыҡтар **5.** *прил.*; *хим.* концентрациялы, ҡуйыртылған; **концентри́рованная кислота́** концентрациялы кислота; **концентри́рованный раство́р** ҡуйыртылған иретмә **6.** *прил.*; *горн.* байыҡтырылған; **концентри́рованная руда́** байыҡтырылған мәғдән

**КОНЦЕНТРИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* туплау, йыйыу; **концентри́ровать войска́** ғәскәр туплау **2.** *на чём*; *перен.* йүнәлтеү, туплау; **концентри́ровать внима́ние** иғтибарҙы йүнәлтеү **3.** *что*; *хим.* ҡуйыртыу, концентрациялау **4.** *что*; *горн.* байыҡтырыу

**КОНЦЕНТРИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** тупланыу, йыйылыу **2.** *на ком-чём*; *перен.* йүнәлеү, тупланыу **3.** *хим.* ҡуйырыу, концентрацияланыу **4.** *горн.* байығыу **5.** *страд. от* **концентри́ровать**

**КОНЦЕНТРИ́ЧЕСКИЙ** и **КОНЦЕНТРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙәктәш; **концентри́ческие круги́** үҙәктәш түңәрәктәр **2.** концентрик; **концентри́ческая систе́ма преподава́ния** уҡытыуҙа концентрик система

**КОНЦЕ́НТРЫ** *мн.* (*ед.* **конце́нтр** *м*); *мат.* үҙәктәш түңәрәктәр

**КОНЦЕ́ПЦИЯ** *ж* концепция (**1.** *бер-береһенә бәйләнешле һәм мөнәсәбәтле фекерҙәр системаһы* **2.** *әҫәрҙәге төп идея, фекер*)

**КОНЦЕ́РН** *м* концерн (*дөйөм финанс етәкселек аҫтында предприятиеларҙың берләшеүе*)

**КОНЦЕ́РТ** *м* концерт; **дать конце́рт** концерт ҡуйыу; **конце́рт для скри́пки с орке́стром** скрипка һәм оркестр өсөн яҙылған концерт ♦ **коша́чий конце́рт** *шутл.* бесәйҙәр мыйылдауы

**КОНЦЕРТА́НТ** *м* концерт биреүсе

**КОНЦЕРТИ́НО** *с нескл.* концертино (**1.** *музыка ҡоралы* **2.** *бәләкәй концерт*)

**КОНЦЕРТИ́РОВАТЬ** *несов.* концерт биреү

**КОНЦЕРТМЕ́ЙСТЕР** *м* концертмейстер (**1.** *оркестрҙа уйнаусылар төркөмө етәксеһе* **2.** *симфония йәки опера оркестры солисы* **3.** *йырсы менән бергә опера партияһын һ.б. өйрәнгән пианист-аккомпаниатор*)

**КОНЦЕ́РТНЫЙ,** -ая, -ое концерт ...ы; **конце́ртная програ́мма** концерт программаһы; **конце́ртный зал** концерт залы; **конце́ртная му́зыка** концерт музыкаһы

**КОНЦЕССИОНЕ́Р** *м* концессионер, концессия хужаһы

**КОНЦЕССИО́ННЫЙ,** -ая, -ое концессия ...ы; **концессио́нный магази́н** концессия магазины ♦ **концессио́нный догово́р** концессия килешеүе

**КОНЦЕ́ССИЯ** *ж* концессия (**1.** *дәүләт ҡарамағындағы ер-һыу байлығын, хужалыҡ объектын һ.б. ваҡытлыса файҙаланырға биреү тураһында килешеү* **2.** *шул килешеү нигеҙендә ойошторолған предприятие*)

**КОНЦЛА́ГЕРЬ** *м* концлагерь

**КОНЦО́ВКА** *ж* **1.** *полигр.* сикләмә (*китап йәки бүлек аҙағындағы биҙәк*) **2.** һуңғы өлөш, аҙаҡ (*әҫәрҙең һуңғы йомғаҡлау өлөшө*); **концо́вка рома́на** романдың аҙағы

**КОНЧА́ТЬ** *несов. см.* **ко́нчить**

**КОНЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **ко́нчиться**

**КО́НЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ко́нчить** **2.** *в знач. сказ., безл.*; *разг.* бөттө; **ме́жду на́ми всё ко́нчено** беҙҙең арала бөтәһе лә бөттө **3.** *в знач. сказ., безл.* етте, булды; **ко́нчено! с за́втрашнего дня броса́ю кури́ть!** етте! иртәгәнән башлап тартмайым! ♦ **ко́нчен бал** бөттө, етте

**КО́НЧЕНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* хәл ителгән, осона сығылған, бөткән; **де́ло ко́нченое** хәл ителгән эш ♦ **ко́нченый челове́к** бөткән кеше, эштән сыҡҡан кеше

**КО́НЧИК** *м* ос; **ко́нчик карандаша́** ҡәләм осо; **ко́нчик но́са** танау осо

**КОНЧИ́НА** *ж*; *высок.* үлем, вафат

**КО́НЧИТЬ** *сов.* **1.** *что, с чем* и *с неопр.* бөтөрөү, тамамлау, тамам итеү; **ко́нчить ремо́нт** йүнәтеүҙе тамамлау; **ко́нчить писа́ть** яҙып бөтөү; **ко́нчить речь приве́тствием** телмәрҙе ҡотлау һүҙе менән бөтөрөү; **ко́нчить университе́т** университет тамамлау **2.** *что, с чем* өҙөү, туҡтатыу; **ко́нчить с куре́нием** тартыуҙы туҡтатыу **3.** *кого-что*; *прост.* үлтереү, бөтөрөү ♦ **ко́нчить жизнь (век)** үлеү; **ко́нчить жизнь самоуби́йством** үҙ-үҙеңде үлтереү, үҙеңә ҡул һалыу; **ко́нчить пло́хо (скве́рно, ду́рно)** түбәнлеккә төшөү, ҡыҙғаныс хәлгә ҡалыу

**КО́НЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** бөтөү, тамамланыу; **уро́к ко́нчился** дәрес бөттө; **тропи́нка ко́нчилась** һуҡмаҡ бөттө; **разгово́р ко́нчился** әңгәмә тамамланды **2.** *разг.* (*умереть*) үлеү

**КОНЪЮНКТИ́ВА** *ж*; *анат.* конъюнктива (*күҙҙең лайлалы тиресәһе*)

**КОНЪЮНКТИВИ́Т** *м*; *мед.* конъюнктивит (*күҙҙең конъюнктиваһы шешеүе*)

**КОНЪЮНКТУ́РА** ж конъюнктура (**1.** *берәй өлкәлә килеп тыуған хәл* **2.** *иҡт. тауар хужалығының хәлен сағылдырған билдәләр*); **междунаро́дная конъюнкту́ра** халыҡ-ара конъюнктура

**КОНЬ** *м* **1.** ат, йылҡы; **гнедо́й конь** туры ат; **сади́ться верхо́м на коня́** ат менеү; **разводи́ть коне́й** йылҡы аҫрау (үрсетеү) **2.** *спорт.* ат; **пойти́ конём** *шахм.* ат менән йөрөү; **упражне́ние на коне́** атта күнекмәләр эшләү ♦ **быть на коне́** еңеүсе итеп хис итеү; **по ко́ням** аттарҙа; **дарёному коню́ в зу́бы не смо́трят** биргәндең битенә ҡарамайҙар; **конь ещё не валя́лся** эш әле башланмаған да; **ход конём** көтөлмәгән аҙым

**КОНЬКИ́** *мн.* (*ед.* **конёк** *м*) коньки, тимераяҡ **беговы́е коньки́** йүгереү конькийы; **ката́ться на конька́х** конькиҙа шыуыу; **занима́ться конька́ми** конькиҙа шыуыу менән шөғөлләнеү

**КОНЬКОБЕ́ЖЕЦ** *м* конькисы, конькиҙа шыуыусы

**КОНЬКОБЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое конькиҙа шыуыу ...ы; **конькобе́жный спорт** конькиҙа шыуыу спорты; **конькобе́жные состяза́ния** конькиҙа шыуыу ярыштары

**КОНЬКО́ВЫЙ,** -ая, -ое атлама ...ы; **конько́вый брус** атлама бурсаһы

**КОНЬЯ́К** *м* коньяк

**КО́НЮХ** *м* ат ҡараусы, конюх; **колхо́зный ко́нюх** колхоздың ат ҡараусыһы

**КОНЮ́ШНЯ** *ж* **1.** атлыҡса, ат аҙбары (һарайы) **2.** *разг., неодобр.* сусҡа аҙбары (*бысраҡ урынға ҡарата*) ♦ **а́вгиевы коню́шни** мәхшәр, ныҡ бысраҡ (йыйыштырылмаған) урын

**КООПЕРАТИ́В** *м* кооператив (*ойошма һәм магазин*); **жили́щный кооперати́в** торлаҡ кооперативы; **строи́тельный кооперати́в** төҙөлөш кооперативы

**КООПЕРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое кооператив, кооперация ...ы; **кооперати́вное иму́щество** кооператив мөлкәт; **кооперати́вная торго́вля** кооператив сауҙа

**КООПЕРА́ТОР** *м* кооператор

**КООПЕРА́ЦИЯ** *ж* кооперация (**1.** *хеҙмәт ойоштороуҙа үҙ-ара бәйле булған төрлө эште күмәк кешенең берләшеп башҡарыуына нигеҙләнгән формаһы* **2.** *ауыл хужалығына, тор-*

*лаҡ төҙөүгә, сауҙаға һ.б. бәйле эштәрҙе бергәләп алып барыу өсөн ағзалар индергән пай иҫәбенә ҡоролған берекмә* **3.** *кооператив магазин*)

**КООПЕРИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *что* кооперативлаштырыу, кооперативҡа берләштереү; **коопери́ровать труд** *чей-л. берәйһенең* хеҙмәтен кооперативлаштырыу **2.** *кого* (*привлечь к кооперации*) кооперативҡа ылыҡтырыу; **коопери́ровать населе́ние** халыҡты кооперативҡа ылыҡтырыу

**КООПЕРИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* кооперативҡа берләшеү, кооперативлашыу **2.** *разг.* берләшеү **3.** *несов. страд. от* **коопери́ровать**

**КООПТА́ЦИЯ** *ж* кооптация (*һайланма органдың һайлау үткәрмәй генә үҙ составына яңы ағза ҡабул итеүе*)

**КООПТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого* кооптациялау

**КООРДИНА́ТОР** *м* координатор

**КООРДИНА́ТЫ** *мн.* (*ед.* **координа́та** *ж*) координат (**1.** *махс. яҫылыҡтағы йәки араўыҡтағы нөктәнең урынын билдәләгән дәүмәл* **2.** *һөйл. торған ер, адрес*)

**КООРДИНАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое координация ...ы; **координацио́нная связь** координация бәйләнеше

**КООРДИНА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **координи́ровать 2.** координация, үҙ-ара ярашыу, килешеү; **координа́ция движе́ний** хәрәкәттәге үҙ-ара ярашыу

**КООРДИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* координациялау, яраштырыу; **координи́ровать пла́ны** пландарҙы координациялау; **координи́ровать свою́ рабо́ту с рабо́той други́х** үҙ эшеңде башҡаларҙың эше менән (яраштырыу) тап килтереү (көйләү)

**КООРДИНИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* координацияланыу **2.** *несов. страд. от* **координи́ровать**

**КОПА́Л** *м* копал, һары ыҫмала (*лак яһау өсөн ҡулланыла*)

**КОПА́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое копал ...ы; **копа́ловый лак** копал лагы

**КОПА́ТЬ** *несов. что* ҡаҙыу; **копа́ть зе́млю** ер ҡаҙыу; **копа́ть я́му** *кому* соҡор ҡаҙыу; **копа́ть карто́фель** картуф ҡаҙыу; **копа́ть черве́й** селәүҡаҙыу ♦ **копа́ть моги́лу** *кому* хөсөтлөк ҡылыу; **копа́ть под** *кого; прост.* яманатлы итеү, хурлыҡҡа төшөрөү

**КОПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *в чём* ҡаҙыныу; **копа́ться в песке́** ҡомда ҡаҙыныу **2.** *в чём; разг.* аҡтарыныу; **копа́ться в сундуке́** һандыҡта аҡтарыныу **3.** *в чём; перен.* соҡсоноу; **копа́ться в свои́х пережива́ниях** кисергән тойғоларыңда соҡсоноу **4.** *с чем; разг.* мыштырлау, бызмырлау; **не копа́йся, конча́й рабо́ту скоре́е** мыштырлама, эшеңде тиҙерәк бөтөр **5.** *страд. от* **копа́ть** ♦ **копа́ться в гря́зном белье́** ғәйбәт һатыу

**КОПЕ́ЕЧКА** *ж; уменьш. от* **копе́йка** ♦ **в копе́ечку стать (вскочи́ть, обойти́сь, влете́ть)** бик ҡыйбатҡа төшөү

**КОПЕ́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бер тинлек; **копе́ечная моне́та** бер тинлек **2.** арзан, осһоҙ, аҙ; **копе́ечная вещь** арзан әйбер; **копе́ечный за́работок** аҙ эш хаҡы **3.** *перен.* бик ваҡсыл, һаран; **копе́ечная душа́** бик һаран кеше

**КОПЕ́ЙКА** *ж* **1.** тин; **де́сять копе́ек** ун тин **2.** *собир.; разг.* тин, аҡса; **бере́чь наро́дную копе́йку** халыҡ аҡсаһын һаҡлау ♦ **без копе́йки (де́нег)** бер тинһеҙ; **до после́дней копе́йки (истра́тить, отда́ть и т.д.)** һуңғы тингә тиклем; **на копе́йку** бик аҙ, бер тинлек; **ни копе́йки**; **ни копе́йки нет (за душо́й)** бер тин аҡсаһыҙ, бер тин аҡсаһы юҡ; **копе́йка в копе́йку** тингә тин (ялғап йәшәү); **за копе́йку уступи́ть (отда́ть)** бик арзанға биреү

**КОПЁР** *м* копёр (**1.** *ҡаты урынға, тәрәнгә свай ҡаға торған ҡулайлама* **2.** *шахта өҫтөндә күтәргес ҡуйыу өсөн эшләнгән ҡоролма*)

**КО́ПИ** *мн.* (*ед.* **копь** *ж*) копи (*таш күмер, тоҙ рудниғы йәки карьеры*)

**КОПИ́ЛКА** *ж* копилка, аҡса йыйыу һауыты

**КОПИ́РКА** *ж; разг.* копирка, копировка ҡағыҙы, күсергес (*ҡағыҙ*); **писа́ть под копи́рку** күсергес аша яҙыу

**КОПИРОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** копирка (күсергес) ...ы; **копирова́льная фа́брика** копирка (күсергес) фабрикаһы **2.** күсереү ...ы; **копирова́льная бума́га** күсереү ҡағыҙы

**КОПИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *что* күсермәһен (нөсхәһен) алыу; **копи́ровать служе́бные бума́ги** эш ҡағыҙҙарының күсермәһен алыу **2.** *кого-что; перен.* булып ҡыланыу, кеүек булыу; **де́ти лю́бят копи́ровать взро́слых** балалар ололар булып ҡыланырға ярата

**КОПИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое күсермә ...ы, нөсхә ...ы; **копиро́вочные рабо́ты** күсермә эштәре

**КОПИРО́ВЩИК** *м* күсереүсе, нөсхә эшләүсе

**КОПИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*беречь, делать запас чего-л.*) йыйыу; **копи́ть де́ньги** аҡса йыйыу **2.** (*собирать, сосредоточивать*) туплау; **копи́ть си́лы** көс туплау

**КОПИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** йыйналыу, йыйыла барыу **2.** *страд. от* **копи́ть**

**КО́ПИЯ** *ж* **1.** күсермә; **ко́пия карти́ны** рәсем күсермәһе; **снять ко́пию** күсермәһен алыу **2.** *перен.* тап үҙе, ҡойоп ҡуйған, һуйып ҡаплаған; **он ко́пия отца́** ул һуйып ҡаплаған атаһы

**КО́ПКА** *ж см.* **копа́ть**; **ко́пка гря́дки** түтәл ҡаҙыу; **ко́пка земли́** ер ҡаҙыу

**КОПНА́** *ж* күбә, сүмәлә; **ста́вить копну́** күбә һалыу; **волочи́ть копну́** күбә тарттырыу ♦ **копна́ воло́с** ҡабарып торған ҡуйы сәс

**КОПНИ́ТЬ** *несов. что* күбәләү, күбәгә һалыу; **копни́ть се́но** бесән күбәләү

**КОПНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙып алыу **2.** *перен.* төшөнөү

**КОПОТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** мыштыр, бызмыр; **копотли́вый челове́к** мыштыр кеше **2.** мәшәҡәтле, ваҡ; **копотли́вая рабо́та** мәшәҡәтле эш

**КО́ПОТЬ** *ж* һөрөм, еҫ; **чёрная ко́поть** ҡара һөрөм

**КОПОШИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** мыжғыу, мыжғып тороу, ҡайнау; **муравьи́ копоша́тся во́зле мураве́йника** иләү янында ҡырмыҫҡалар мыжғып тора **2.** *разг.* булышыу, маташыу; **он копоши́тся во дворе́** ул өй алдында булышып йөрөй

**КО́ПРА** и **КОПРА́** *ж* копра (*кокос сәтләүегенең май һығыла торған үҙәге*); **жмых ко́пры** копра төпрәһе

**КОПТЕ́ТЬ** *несов.* һөрөмләнеү, ҡоромланыу; **ла́мпа копти́т** шәм һөрөмләнә

**КОПТИ́ЛКА** *ж*; *разг.* һуҡыр шәм

**КОПТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ыҫлау ...ы, ҡаҡлау ...ы; **копти́льная печь** ыҫлау мейесе; **копти́льная ка́мера** ҡаҡлау камераһы

**КОПТИ́ЛЬНЯ** *ж* ыҫлыҡ (*ит, балыҡ һ.б. ыҫлау, ҡаҡлау урыны*)

**КОПТИ́ТЬ** *несов.* **1.** һөрөмләү, ыҫлау, төтөн сығарыу, төтәү; **ла́мпа копти́т** шәм һөрөмләнә **2.** *что* һөрөмләү; **копти́ть стекло́** быяла һөрөмләү **3.** *кого-что* ыҫлау, ҡаҡлау; **копти́ть ры́бу** балыҡ ыҫлау

**КОПТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һөрөм ултырыу, һөрөмләнеү, ыҫланыу; **занаве́ски от ды́ма коптя́тся** төтөндән ҡормаларға һөрөм ултыра **2.** (*о рыбе, мясе и т.п.*) ыҫланыу, ҡаҡланыу **3.** *страд. от* **копти́ть** 2, 3

**КОПУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *что*; *сад.* ботаҡ ялғау (*ағасты киҫеп, бөрөлө ботаҡ ялғау*) **2.** *биол.* ҡушылыу, берегеү

**КОПУЛИРО́ВКА** *ж*; *сад.* ботаҡ ялғау

**КОПУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *биол.* ҡушылыу (*иң ябай организмдарҙың ике енси күҙәнәгенең ҡушылыуы*)

**КОПУ́Н** *м*; *разг.* мыштыр (бызмыр) кеше; **копу́нья** *ж*; *разг.* мыштырбикә, бызмырбикә

**КОПУ́ША** *м* и *ж*; *разг. см* **копу́н, копу́нья**

**КОПЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **копти́ть** 3; **ры́ба холо́дного копче́ния** һыуыҡлай ыҫланған балыҡ **2.** *мн.* **копче́нья** *см.* **копчёности**

**КОПЧЁНОСТИ** *мн.* (*ед.* **копчёность** *ж*) ыҫланған (ҡаҡланған) ашамлыҡ

**КОПЧЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ыҫланған, ҡаҡланған; **копчёная колбаса́** ҡаҡланған колбаса (тултырма) **2.** ыҫлы, һөрөмлө; **копчёное стекло́** һөрөмлө быяла

**КО́ПЧИК** *м*; *анат.* ҡоймос

**КО́ПЧИКОВЫЙ,** -ая, -ое ҡоймос ...ы; **ко́пчиковые позвонки́** ҡоймос умыртҡалары ♦ **ко́пчиковая кость** ҡоймос һөйәге

**КОПЧУ́ШКА** *ж*; *разг.* ҡаҡланған ваҡ балыҡ

**КОПЫ́Л** *м* сана теше (тырнағы); **са́ни с высо́кими копы́льями** оҙон тырнаҡлы сана

**КОПЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тояҡ ...ы; **копы́тный след** тояҡ эҙе; **копы́тные боле́зни** тояҡ ауырыуҙары **2.** тояҡлы; **копы́тные живо́тные** тояҡлы хайуандар

**КОПЫ́ТО** *с* тояҡ; **па́рные копы́та** ҡуш тояҡ

**КОПЬЁ** *с* һөңгө; **охо́тничье копьё** һунар һөңгөһө; **мета́ть копьё** һөңгө сөйөү ♦ **ко́пья лома́ть** бик ныҡ сәкәләшеп алыу

**КОПЬЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое һөңгө һымаҡ (рәүешле), оҙонса; **копьеви́дный коне́ц** осо һөңгө һымаҡ, һөңгө һымаҡ осло, осо оҙонса

**КОРА́** *ж* **1.** ҡайыр, ҡабыҡ; **кора́ де́рева** ағас ҡабығы; **кора́ ли́пы** йүкә ҡайыры **2.** ҡатлау, ҡатлам; **ледяна́я кора́** боҙ ҡатлауы ♦ **земна́я кора́** *геол.* ер ҡабығы (ҡатламы); **кора́ больши́х полуша́рий головно́го мо́зга** *анат.* баш мейеһе ярымшарҙарының ҡабығы

**КОРАБЕ́Л** *м*; *разг.* карап төҙөүсе (*белгес*)

**КОРАБЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** карап ...ы; **корабе́льная ма́чта** карап мачтаһы **2.** карап төҙөү (ремонтлау) ...ы, карап төҙөүгә (ремонтлауға) яраҡлы; **корабе́льная верфь** карап төҙөү һәм ремонтлау верфе ♦ **корабе́льный лес** карап төҙөүгә яраҡлы ағастар

**КОРАБЛЕВОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **судовожде́ние**

**КОРАБЛЕКРУШЕ́НИЕ** *с* карап һәләкәте

**КОРАБЛЕСТРОЕ́НИЕ** *с см.* **судострое́ние**

**КОРАБЛЕСТРОИ́ТЕЛЬ** *м* карап төҙөүсе (*белгес*)

**КОРАБЛЕСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое карап төҙөү ...ы; **кораблестрои́тельные рабо́ты** карап төҙөү эштәре

**КОРА́БЛЬ** *м* карап; **вое́нный кора́бль** хәрби карап; **возду́шный кора́бль** һауа карабы; **косми́ческий кора́бль** йыһан карабы ♦ **сжига́ть (жечь) свои́ корабли́** кире уйлауға юл ҡалдырмау, ныҡлы хәл итеү

**КОРА́ЛЛ** *м* мәрйен (**1.** *зоол. диңгеҙ хайуаны* **2.** *шул хайуандарҙың эзбиз ҡалдыҡтарынан барлыҡҡа килгән асыҡ ҡыҙыл, ал, аҡ таштар* **3.** *шул таштарҙан яһалған биҙәүестәр*); **ожере́лье из кора́ллов** мәрйен муйынсаҡ; **кра́сный кора́лл** ҡыҙыл мәрйен; **ме́лкий кора́лл** ваҡ мәрйен; **носи́ть кора́ллы** мәрйен тағыу

**КОРА́ЛЛОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәрйен ...ы; **кора́лловый о́стров** мәрйен утрауы **2.** мәрйен; **кора́лловая ни́тка** мәрйен еп; **кора́лловое ожере́лье** мәрйен муйынсаҡ **3.** янып торған ҡыҙыл, ҡып-ҡыҙыл; **кора́лловые гу́бы** ҡып-ҡыҙыл ирен

**КОРА́Н** *м* Ҡөрьән; **чита́ть Кора́н** Ҡөрьән уҡыу

**КОРВЕ́Т** *м*; *мор.* корвет (**1.** *өс мачталы бороңғо хәрби карап* **2.** *Британия һәм Америка флотында бәләкәй һаҡсы карап*)

**КОРД** *м*; *спец*. корд (**1.** *кизе-мамыҡ йәки яһалма сүстән сиратып иләнгән еп* **2.** *йөн туҡыма төрө*)

**КО́РДА** *ж*; *спец*. корда, арҡан, оҙон теҙген; **гоня́ть ло́шадь на ко́рде** атты оҙон теҙген менән тотоп ҡыуып йөрөтөү

**КОРДЕБАЛЕ́Т** *м*; *театр*. кордебалет (*күмәк бейеү башҡарыусы балет артистары*)

**КО́РДНЫЙ,** -ая, -ое *спец*. корд ...ы; **ко́рдное волокно́** корд сүс; **ко́рдная ткань** корд туҡыма

**КОРДО́Н** *м* кордон (**1.** *сик буйындағы йәки урмандағы һаҡ* **2.** *шул һаҡ торған ер* **3.** *сик буйы*); **лесно́й кордо́н** урман кордоны; **тамо́женный кордо́н** таможня кордоны; **служи́ть на кордо́не** кордонда хеҙмәт итеү

**КОРЕВО́Й,** -ая, -ое *мед*. ҡыҙылса ...ы; **корева́я сыпь** ҡыҙылса сабыртмаһы

**КОРЕ́ЙКА** *ж* түш ите

**КОРЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое корей ...ы, Корея ...ы; **коре́йский язы́к** корей теле

**КОРЕ́ЙЦЫ** *мн*. корейҙар, корей халҡы // *ед*. **коре́ец** *м* корей ир-аты; **корея́нка** *ж* корей ҡатын-ҡыҙы

**КОРЕНА́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** мыҡты, киң яурынлы; **корена́стый мужчи́на** мыҡты ир **2.** ныҡ тамырлы, төптән йыуан; **корена́стое де́рево** ныҡ тамырлы ағас

**КОРЕНИ́ТЬСЯ** *несов*. **1.** *в чём* -тан/-тән килеү, нигеҙләнеү; **суеве́рия кореня́тся в неве́жестве** юҡ-барға ышаныу наҙанлыҡтан килә **2.** *в ком-чём*; *перен*. ныҡ ултырыу, төптә ятыу

**КОРЕННИ́К** *м* төпкө ат (*еккәндә*)

**КОРЕННО́Й,** -ая, -ое **1.** төп, ерле; **коренно́е населе́ние** төп халыҡ **2.** төп, төптән, нигеҙенән, тамырынан; **коренно́й вопро́с** төп мәсьәлә; **коренны́е преобразова́ния** тамырынан үҙгәртеүҙәр ♦ **коренны́е зу́бы** аҙау тештәр; **коренна́я ло́шадь** төпкө ат (*еккәндә*); **коренны́м о́бразом** тамырынан, тулыһынса

**КО́РЕНЬ** *м* **1.** тамыр, төп; **ко́рень де́рева** ағас тамыры; **пять корне́й я́блонь** биш төп алма; **ко́рень зу́ба** теш төбө; **ко́рни воло́с** сәс төбө **2.** *перен*. нигеҙ, төп, баш; **ко́рень оши́бок** хаталар нигеҙе; **ко́рень зла** бәлә башы **3.** *грам*., *мат*. тамыр; **ко́рень сло́ва** һүҙ тамыры; **извлека́ть ко́рень** тамырын табыу ♦ **в ко́рне** тулыһынса, тамырынан; **на корню́**: 1) урылмаған, сабылмаған (*үлән, ашлыҡ тураһында*); 2) *перен*. иң баштан; **ко́рень жи́зни** йәшәү тамыры (*женьшень үҫемлегенең икенсе исеме*); **пусти́ть ко́рни**: 1) төпләнеү, нигеҙләнеү; 2) тамыр йәйеү; **запря́чь в ко́рень** төпкә (төпкө ат итеп) егеү; **в ко́рне пресе́чь** баштан алыу, туҡтатыу; **смотре́ть в ко́рень** асылына төшөнөү; **красне́ть до корне́й воло́с** оялыуҙан ҡып-ҡыҙыл булыу; **подорва́ть с ко́рнем** *что* тамырынан ҡоротоу (*ҙур зыян, этлек эшләү*)

**КОРЕШО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **ко́рень** 1; **2.** (*часть переплёта книги*) тамырса, төп; **корешо́к кни́ги** китап төбө **3.** (*в квитанционной книжке*) төп

**КОРЖ** *м* корж (*сөсө ҡамырҙан йоҡартып бешерелгән пәрәник төрө*)

**КО́РЖИК** *м* **1.** *уменьш. от* **корж** **2.** коржик (*шәкәр ҡомо һибеп бешерелгән йәймә, көлсә*)

**КОРЗИ́НА** *ж* кәрзин; **плетёная корзи́на** үрелгән кәрзин

**КОРЗИ́НКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **корзи́на** **2.** *бот*. кәрзинкә (*сәскәлек төрө*); **корзи́нка подсо́лнечника** көнбағыш кәрзинкәһе (башы)

**КОРЗИ́ННЫЙ,** -ая, -ое кәрзин ...ы; **корзи́нное произво́дство** кәрзин етештереү (кәсебе)

**КОРЗИ́НЩИК** *м* кәрзин үреүсе

**КОРИА́НДР** *м* кориандр (*үҫемлек*)

**КОРИА́НДРОВЫЙ,** -ая, -ое кориандр ...ы; **кориа́ндровое се́мя** кориандр орлоғо; **кориа́ндровое ма́сло** кориандр майы

**КОРИДО́Р** *м* коридор; **дли́нный коридо́р** оҙон коридор

**КОРИДО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** коридор ...ы; **коридо́рные часы́** коридор сәғәте **2.** *в знач. сущ*. **коридо́рный** *м* и **коридо́рная** *ж* коридорсы (*ҡунаҡханаларҙа бер нисә бүлмәне ҡараусы хеҙмәткәр*) ♦ **коридо́рная систе́ма** коридор системаһы (*ишектәре бер коридорға сыҡҡан бүлмәләр*)

**КОРИ́НКА** *ж* ҡара йөҙөм (*һөйәкһеҙ йөҙөм*)

**КОРИ́ТЬ** *несов*. *кого*; *разг*. **1.** (*упрекать*) шелтәләү, әрләү, тиргәү; **кори́ть за ве́треность** елғыуарлыҡ өсөн шелтәләү; **кори́ть за гру́бость** тупаҫлыҡ өсөн әрләү **2.** *чем* (*попрекать*) ғәйепләү, үртәү, битәрләү; **кори́ть куско́м хле́ба** бер телем икмәк өсөн битәрләү

**КОРИФЕ́Й** *м*; *высок*. корифей (*берәй эш өлкәһендәге иң күренекле эшмәкәр*); **корифе́и нау́ки** фән корифейҙары (эшмәкәрҙәре)

**КОРИ́ЦА** *ж* дәрсен; **за́пах кори́цы** дәрсен еҫе

**КОРИ́ЧНЕВЫЙ,** -ая, -ое ҡуңыр, көрән; (*о коже*) янып ҡарайған; **кори́чневый цвет** ҡуңыр төҫ; **кори́чневый костю́м** көрән костюм; **кори́чневое от зага́ра лицо́** ҡояшта янып ҡарайған йөҙ

**КОРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое дәрсен ...ы; **кори́чное де́рево** дәрсен ағасы; **кори́чное ма́сло** дәрсен майы

**КО́РКА** *ж* **1.** ҡатлау, ҡатлам; **ледяна́я ко́рка** боҙ ҡатламы; **по́чвенная ко́рка** тупраҡ ҡатлауы **2.** (*хлеба, пирога и т.п.*) ҡатыһы, ҡыртыш; **хле́бная ко́рка** икмәк ҡатыһы **3.** ҡабыҡ; **апельси́новая ко́рка** әфлисун ҡабығы; **ды́нная ко́рка** ҡауын ҡабығы **4.** *бот*. ҡайыр; **ко́рка ду́ба** имән ҡайыры **5.** *разг*. (*обложка книги*) тыш ♦ **от ко́рки до ко́рки** башынан аҙағына тиклем

**КО́РКОВЫЙ,** -ая, -ое *анат*. ҡабыҡ ...ы; **ко́рковое вещество́** ҡабыҡ матдәһе; **ко́рковый слой** ҡабыҡ ҡатламы

**КОРМ** *м* **1.** аҙыҡ, мал аҙығы, ем (*ҡош өсөн*); **комбини́рованный корм** ҡатнаш аҙыҡ; **зада́ть**

**корм лошадя́м** аттарға аҙыҡ һалыу; **клева́ть корм** ем сүпләү **2.** *см.* **кормле́ние ♦ подно́жный корм** нисек тура килә шулай ризыҡланыу, ни табыла, шуны ашау

**КОРМА́** *ж* ҡойроҡ; **сесть на корму́ ло́дки** кәмәнең ҡойроғона ултырыу

**КОРМЁЖКА** *ж* **1.** *разг. см.* **корми́ть, корми́ться** 1; **кормёжка скота́** мал ашатыу **2.** (*место питания животных*) ашатыу урыны **3.** *прост.* ризыҡ, ашамлыҡ

**КОРМИ́ЛЕЦ** *м* ҡараусы, аҫраусы, ашатыусы; **потéря корми́льца** ҡараусыһыҙ ҡалыу

**КОРМИ́ЛИЦА** *ж* имеҙеүсе ҡатын, һөт әсәһе

**КОРМИ́ЛО** *с*; *трад.-поэт.* кәмә руле ♦ **у корми́ла вла́сти (стоя́ть)** *книжн.* власть башында (тороу)

**КОРМИ́ТЬ** *несов. кого* **1.** *прям., перен.* ашатыу, ҡарау; **корми́ть больно́го с ло́жки** ауырыуҙы ҡалаҡ менән ашатыу; **корми́ть скот** мал ашатыу; **корми́ть всю семью́** бөтә ғаиләне ашатыу **2.** (*своим молоком*) имеҙеү; **корми́ть ребёнка** баланы имеҙеү ♦ **корми́ть обеща́ниями** буш вәғәҙә биреү; **хле́бом не корми́** теләгәнен эшләргә генә бир, башҡа бер ни кәрәкмәй

**КОРМИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ашау, туҡланыу, туйыныу; **корми́ться ры́бой** балыҡ менән туҡланыу **2.** тороу, йәшәү; **корми́ться свои́м трудо́м** үҙ көсөң менән йәшәү

**КОРМЛЕ́НИЕ** *с см.* **корми́ть**; **кормле́ние скота́** мал ашатыу

**КОРМОВО́Й I,** -ая, -ое аҙыҡ, мал аҙығы ...ы; **кормова́я свёкла** мал сөгөлдөрө; **кормово́й фонд** мал аҙығы фонды ♦ **кормова́я ба́за** мал аҙығы базаһы

**КОРМОВО́Й II,** -ая, -ое **1.** ҡойроҡ ...ы; **кормово́е весло́** ҡойроҡ ишкәге; **кормово́й флаг** ҡойроҡ флагы **2.** *в знач. сущ.* **кормово́й** *м* (*рулевой*) ҡойроҡсо, ҡойроҡ тотоусы

**КОРМОКУ́ХНЯ** *ж*; *с.-х.* мал аҙығы әҙерләү бүлмәһе (бинаһы)

**КОРМОПРОИЗВО́ДСТВО** *с*; *с.-х.* мал аҙығын етештереү

**КОРМОРЕ́ЗКА** *ж*; *с.-х.* мал аҙығы тураҡлағыс (ваҡлағыс) (*машина*)

**КОРМУ́ШКА** *ж* **1.** тағараҡ; **положи́ть овса́ в корму́шку** тағараҡҡа һоло һалыу **2.** *перен., прост., пренебр.* төшөмлө урын

**КО́РМЧИЙ** *м* **1.** *уст.* ҡойроҡсо, ҡойроҡ тотоусы (ишеүсе) **2.** *перен., высок.* юлбашсы

**КОРНА́ТЬ** *несов. кого-что*; *прост.* мөнтәү, ҡыҫҡа (тигеҙһеҙ) итеп ҡырҡҡылау; **корна́ть во́лосы** сәс мөнтәү

**КОРНЕВИ́ЩЕ** *с* **1.** тамырһабаҡ (*үҫемлектең ер аҫты һабағы*); **корневи́ще хре́на** керән тамырһабағы **2.** төп тамыр; **корневи́ще ду́ба** имәндең төп тамыры

**КОРНЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** тамыр ...ы; **корнево́е ответвле́ние** тамыр тармағы **2.** *грам.* тамыр; **корневы́е слова́** тамыр һүҙҙәр

**КОРНЕНО́ЖКИ** *мн.* (*ед.* **корнено́жка** *ж*); *зоол.* тамыраяҡ (*иң ябай төҙөлөшлө бер күҙәнәкле тереклек*)

**КОРНЕПЛО́ДЫ** *мн.* (*ед.* **корнепло́д** *м*) тамыраҙыҡ (*кишер, сөгөлдөр һ.б.*); **загото́вка корнепло́дов** тамыраҙыҡ әҙерләү

**КОРНЕРЕ́ЗКА** *ж* тамыр ваҡлағыс (*тураҡлағыс машина*)

**КОРНЕ́Т I** *м* корнет (*элек кавалерия һәм сик һаҡлау ғәскәрендә иң кесе офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәләге кеше*)

**КОРНЕ́Т II** *м*; *муз.* корнет (*тынлы музыка ҡоралы*)

**КОРНИШО́Н** *м* корнишон (*сәскәһен ҡойғас та маринадлау өсөн өҙөлгән ваҡ ҡыяр*)

**КОРНОУ́ХИЙ,** -ая, -ое *разг.* тоҡор ҡолаҡлы; **корноу́хий пёс** тоҡор ҡолаҡлы эт

**КО́РОБ** *м* **1.** алап, ҡап, мәрке, тырыз; **он привёз по́лный ко́роб това́ра** ул тулы бер ҡап тауар алып килде **2.** (*кузов телеги, саней*) әрйә; (*кузов автомашины*) кузов **3.** *в знач. нареч.* **ко́робом**; *разг.* ҡаптай, ҡап кеүек, ҡабарынып; **шу́ба де́ржится на нём ко́робом** туны өҫтөндә ҡап кеүек тора ♦ **це́лый ко́роб** бер тоҡ (*"бик күп" тигәнде аңлата*); **с три ко́роба наговори́ть (наобеща́ть)** арттырып самаһыҙ һөйләү (вәғәҙәләр биреү)

**КОРОБЕ́ЙНИК** *м* ҡырҡтартмасы, асламсы

**КОРО́БИТЬ** *несов.* **1.** *что* ҡалтайтыу; **сы́рость коро́бит до́ску** еүеш(лек) таҡтаны ҡалтайта **2.** *кого* әсендереү, үртәндереү; **меня́ коро́бит от его́ гру́бости** уның тупаҫлығы мине үртәндерә

**КОРО́БИТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡалтайыу; **коро́биться от вла́ги** еүеш(лек)тән ҡалтайыу **2.** тырпайыу, тырпайып (ҡабарып, ҡалҡып) тороу; **соро́чки коро́бятся от крахма́ла** күлдәктәр крахмалдан ҡабарып тора

**КОРО́БКА** *ж* ҡап, ҡумта; **спи́чечная коро́бка** шырпы ҡабы; **коро́бка с кры́шкой** ҡапҡаслы ҡумта ♦ **коро́бка скоросте́й** *тех.* тиҙлекте алмаштырыу ҡабы; **коро́бка переда́ч** *тех.* тапшырыусы ҡап

**КОРОБО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **ко́роб 2.** *разг.* ҡап, бәләкәй тартма; **коробо́к спи́чек** бер ҡап шырпы

**КОРО́БОЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **коро́бка 2.** *бот.* төймәләк; **коро́бочка хло́пка** мамыҡ төймәләге

**КОРО́БОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡап ...ы, ҡумта ...ы; **коро́бочный карто́н** ҡап ҡатырғаһы, ҡатырға ҡумта

**КОРО́ВА** *ж* һыйыр; **пе́гая коро́ва** ала һыйыр; **до́йная коро́ва** һауын һыйыр

**КОРО́ВИЙ,** -ья, -ье һыйыр ...ы; **коро́вье молоко́** һыйыр һөтө; **коро́вье вы́мя** һыйыр елене

**КОРО́ВКА** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **коро́ва** ♦ **бо́жья коро́вка** *см.* **бо́жий**

**КОРО́ВНИК** *м* һыйыр аҙбары (һарайы)

**КОРОЕ́Д** *м* ҡабыҡ ҡуңыҙы

**КОРОЛЕ́ВА** *ж* **1.** (*титул*) королева **2.** (*жена короля*) король ҡатыны **3.** *разг.* королева (*һоҡланғыс матур ҡатын-ҡыҙ*) **4.** *чего, какая* королева; **короле́ва красоты́** һылыулыҡ королеваһы; **короле́ва та́нца** бейеү королеваһы **5.** *шахм. см.* **ферзь**

**КОРОЛЕ́ВСКИЙ,** -ая, -ое король ...ы; **короле́вская власть** король хакимлығы; **короле́вский фланг** *шахм.* король флангы

**КОРОЛЕ́ВСТВО** *с* короллек; **Да́тское короле́вство** Дания короллеге

**КОРОЛЁК** *м* **1.** королёк (*әфлисун сорты*) **2.** *зоол.* кәрлә турғай

**КОРО́ЛЬ** *м*; *в разн. знач.* король; **коро́ль Непа́ла** Непал короле; **у́гольный коро́ль** күмер короле; **бубно́вый коро́ль** *карт.* бубий король; **де́лать ход королём** *шахм.* король менән йөрөү ♦ **кум королю́** үҙе баш, үҙе түш (*бөтәһен дә хәл итә алған кешегә ҡарата*)

**КОРОМЫ́СЛО** *с* **1.** (*для вёдер, у весов*) көйәнтә **2.** (*у колодца*) сиртмә **3.** *зоол.* (*насекомое*) энәғараҡ ♦ **дым коромы́слом** шау-шыу, тәртипһеҙлек

**КОРО́НА** *ж*; *в разн знач.* таж; **ца́рская коро́на** батша тажы; **борьба́ за коро́ну** тәхет өсөн көрәш; **со́лнечная коро́на** *астр.* ҡояш тажы

**КОРОНА́РНЫЙ,** -ая, -ое *мед.* коронар (*йөрәктәге ҡан әйләнеше*); **корона́рные сосу́ды** коронар тамырҙар ♦ **корона́рное кровообраще́ние** коронар ҡан әйләнеше; **корона́рная недоста́точность** коронар етешмәүсәнлек

**КОРОНА́ЦИЯ** *ж* таж кейҙереү йолаһы, тәхеткә ултыртыу

**КОРО́НКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **коро́на** **2.** *анат.* коронка (*тештең тышҡы яғы*) **3.** коронка, теш тажы; **золота́я коро́нка** алтын коронка; **поста́вить коро́нку на зуб** тешкә коронка кейҙереү (ҡуйыу); **алма́зная коро́нка** *тех.* алмас коронка

**КОРО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** таж ...ы; **коро́нное украше́ние** таж биҙәге **2.** иң уңышлы; **коро́нная роль** иң уңышлы роль

**КОРОНОВА́НИЕ** *с см.* **коронова́ть**

**КОРОНО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **коронова́ть** **2.** *прил.* тажлы

**КОРОНОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* *кого* таж кейҙереү, тәхеткә ултыртыу

**КОРОНОВА́ТЬСЯ** *сов.*, *несов.* таж кейеү, тәхеткә ултырыу

**КОРО́СТА** *ж* ҡутыр

**КОРОСТЕ́ЛЬ** *м* тартай

**КОРОТА́ТЬ** *несов.* *что*; *разг.* уҙҙырыу, уҙғартыу, ҡыҫҡартыу; **корота́ть вре́мя** ваҡыт уҙҙырыу; **корота́ть ве́чер в разгово́рах** кисте һөйләшеп уҙҙырыу

**КОРОТА́ТЬСЯ** *несов.* уҙыу; **дни корота́лись в бесе́дах** көн әңгәмә менән уҙҙы

**КОРО́ТКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҫҡа, ҡоҫос; **коро́ткие во́лосы** ҡыҫҡа сәс; **коро́ткая ю́бка** ҡыҫҡа юбка (итәк); **коро́ткий хвост** ҡоҫос ҡойроҡ **2.** *разг.* тәпәш, ҡоҡор; **коро́ткий челове́к** тәпәш кеше **3.** (*малый по времени*) ҡыҫҡа, әҙ; **на коро́ткий срок** ҡыҫҡа ваҡытҡа **4.** (*быстрый*, *решительный*) тиҙ, ҡаты; **коро́ткая распра́ва** ҡаты яза биреү **5.** (*близкий*, *дружественный*) дуҫтарса, яҡын; **коро́ткие отноше́ния** дуҫтарса (яҡын) мөнәсәбәттәр ♦ **коро́ткая волна́** ҡыҫҡа тулҡын (*10 метрҙан 150 метрға тиклем оҙонлоҡтағы радио тулҡындар*); **коро́ткое замыка́ние** *физ.* ҡыҫҡа ялғаныш; **коро́ткая па́мять** насар хәтер; **ру́ки коротки́** *у кого* ҡулы ҡыҫҡа; **коро́ткий ум** етешмәгән аҡыл; **на коро́ткой ноге́** *с кем* яҡшы әшнә булыу; **в коро́тких слова́х** ҡыҫҡаса әйткәндә; **коро́че воробьи́ного но́са** ҡыҫҡа ғына

**КО́РОТКО** *нареч.* **1.** ҡыҫҡа, ҡыҫҡа итеп; **стричь во́лосы ко́ротко** сәсте ҡыҫҡа алыу; **ко́ротко одева́ться** ҡыҫҡа итеп кейенеү **2.** (*близко*, *интимно*) яҡын, әшнәләрсә; **быть ко́ротко знако́мым** *с кем-л.* *берәү менән* яҡын таныш булыу **3.** (*вкратце*) ҡыҫҡаса ♦ **ко́ротко говоря́** ҡыҫҡаса әйткәндә

**КОРОТКО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡыҫҡа" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө*, *мәҫ.*, **коротконо́сый** ҡоҡор танаулы; **коротконо́гий** ҡыҫҡа аяҡлы; **коротковоло́сый** ҡыҫҡа сәсле

**КОРОТКОВОЛНОВИ́К** *м*; *радио.* ҡыҫҡа тулҡын һәүәҫкәре (*ҡыҫҡа тулҡында радиотапшырыуҙар ҡабул итеүсе һәм үҙе лә тапшырыусы радио һәүәҫкәре*)

**КОРОТКОВО́ЛНОВЫЙ и КОРОТКОВОЛНО́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа тулҡындағы; **коротково́лновая радиоста́нция** ҡыҫҡа тулҡындағы радиостанция; **коротково́лновая радиосвя́зь** ҡыҫҡа тулҡындағы радиобәйләнеш

**КОРОТКОВОЛО́СЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа сәсле

**КОРОТКОМЕТРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа метражлы; **короткометра́жный фильм** ҡыҫҡа метражлы фильм

**КОРОТКОНО́ГИЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа аяҡлы; **коротконо́гий челове́к** ҡыҫҡа аяҡлы кеше; **коротконо́гая скаме́йка** ҡыҫҡа аяҡлы эскәмйә

**КОРОТКОПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа бармаҡлы; **короткопа́лые ру́ки** ҡыҫҡа бармаҡлы ҡулдар

**КОРОТКОПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа салғыйлы; **короткопо́лая шине́ль** ҡыҫҡа салғыйлы шинель

**КОРОТКОХВО́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа ҡойроҡло; **короткохво́стый бык** ҡыҫҡа ҡойроҡло үгеҙ

**КОРОТКОШЕ́ЙИЙ,** -шеяя, -шеее ҡыҫҡа муйынлы

**КОРОТКОШЁРСТНЫЙ** и **КОРОТКОШЁРСТЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа йөнлө; **короткошёрстые о́вцы** ҡыҫҡа йөнлө һарыҡтар; **короткошёрстный пёс** ҡыҫҡа йөнлө эт

**КОРОТЫ́ШКА** *м* и *ж*; *прост.* төпөш, тәбәнәк, тоҡор, тоҡос

**КОРПЕ́ТЬ** *несов. над чем* и *без доп.*; *разг.* тырышып эшләү, баш күтәрмәй эшләү (ултырыу); **корпе́ть над зада́чей** мәсьәлә өҫтөндә баш күтәрмәй эшләү

**КОРПОРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое корпорация ...ы; **корпорати́вные интере́сы** корпорация мәнфәғәттәре

**КОРПОРА́ЦИЯ** *ж* корпорация (*айырым бер ҡатлам йәки бер һөнәр кешеләренең мәнфәғәте нигеҙендә ойошҡан төркөм*); **за́мкнутая корпора́ция** ябыҡ корпорация

**КОРПУ́НКТ** *м* корпункт (*гәзит корреспонденттарының (хәбәрселәренең) информация алыу һәм тапшырыу пункты*)

**КО́РПУС** *м* **1.** (*мн.* **ко́рпусы**) кәүҙә; **пода́ться всем ко́рпусом вперёд** бөтә кәүҙә менән алға ынтылыу **2.** (*мн.* **корпуса́** и **ко́рпусы**) *в разн. знач.* корпус; **ко́рпус корабля́** карап корпусы; **ко́рпус часо́в** сәғәт корпусы; **стрелко́вый ко́рпус** уҡсылар корпусы; **та́нковый ко́рпус** танк корпусы; **заводско́й ко́рпус** завод корпусы; **дипломати́ческий ко́рпус** дипломатик корпус

**КОРПУСНО́Й,** -ая, -ое корпус ...ы; **корпусно́й команди́р** корпус командиры

**КО́РПУСНЫЙ,** -ая, -ое корпус ...ы; **ко́рпусный мета́лл** корпус металы

**КОРРЕКТИ́В** *м* корректив, төҙәтмә; **внести́ корректи́вы в ру́копись** ҡулъяҙмаға төҙәтмәләр индереү

**КОРРЕКТИ́РОВАТЬ** *несов. что* **1.** төҙәтеү, төҙәтмәләр индереү; **корректи́ровать статью́** мәҡәләне төҙәтеү; **корректи́ровать стрельбу́** *воен.* атыуға төҙәтмәләр индереү **2.** *сов.* (*откорректировать*) корректура уҡып төҙәтеү; **корректи́ровать кни́гу** китаптың корректураһын уҡып төҙәтеү

**КОРРЕКТИРО́ВКА** *ж*; *воен.* корректировка (*атыуға төҙәтмәләр индереү*); **дать то́чную корректиро́вку** атыуға дөрөҫ корректировка биреү

**КОРРЕКТИРО́ВЩИК** *м*; *воен.* корректировкалаусы (*снарядтың дөрөҫ төшөү-төшмәүен күҙәтеп, төҙәтеп барыусы кеше, самолёт йәки радар*)

**КОРРЕ́КТНОСТЬ** *ж* әҙәплелек, нәзәкәтлек; **корре́ктность отноше́ния** мөнәсәбәттең әҙәплелеге; **отлича́ться корре́ктностью посту́пков** әҙәплелек менән айырылып тороу

**КОРРЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпле, нәзәкәтле; **корре́ктный челове́к** нәзәкәтле кеше; **корре́ктное поведе́ние** әҙәпле, тәртипле ҡылыҡ

**КОРРЕ́КТОР** *м* корректор, корректура уҡыусы; **изда́тельский корре́ктор** нәшриәт корректоры

**КОРРЕ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое корректор ...ы; **корре́кторская пра́вка** корректор төҙәтмәһе; **корре́кторская рабо́та** корректор эше

**КОРРЕКТУ́РА** *ж* корректура (**1.** *типография оттискыһын төҙәтеү эше* **2.** *типографияла йыйылған саҡта киткән хатаны төҙәтеү өсөн алынған оттиск*); **чита́ть корректу́ру** корректура уҡыу

**КОРРЕКТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое корректура ...ы; **корректу́рные зна́ки** корректура билдәләре; **корректу́рные исправле́ния** корректура төҙәтмәләре

**КОРРЕ́КЦИЯ** *ж* **1.** *спец.* төҙәтеү; **корре́кция зре́ния** насар күреүҙе төҙәтеү **2.** *тех.* коррекция; **корре́кция шкалы́ вольтме́тра** вольтметр шкалаһына коррекция яһау

**КОРРЕЛЯТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* үҙ-ара бәйләнешле, коррелятив; **корреляти́вные поня́тия** үҙ-ара бәйләнешле төшөнсәләр

**КОРРЕЛЯЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* корреляция ...ы, корреляцион; **корреляцио́нная зави́симость** корреляция бәйләнгәнлеге

**КОРРЕЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* корреляция (*төрлө нәмә, төшөнсә йәки күренештең үҙ-ара бәйләнеше, мөнәсәбәте*); **корреля́ция зву́ков** өндәр корреляцияһы

**КОРРЕСПОНДЕ́НТ** *м* **1.** хатлашыусы, хәбәрләшеүсе, корреспондент **2.** хәбәрсе; **корреспонде́нт газе́ты** гәзит хәбәрсеһе; **внешта́тный корреспонде́нт** штаттан тыш хәбәрсе ♦ **член-корреспонде́нт Акаде́мии нау́к Респу́блики Башкортоста́н** Башҡортостан Республикаһы фәндәр академияһының ағза-корреспонденты

**КОРРЕСПОНДЕ́НТСКИЙ,** -ая, -ое хәбәрсе ...ы; **корреспонде́нтский биле́т** хәбәрсе билеты

**КОРРЕСПОНДЕ́НЦИЯ** *ж* **1.** хатлашыу, яҙышыу; **вести́ корреспонде́нцию** хатлашып тороу **2.** *собир.* хаттар, корреспонденция; **доста́вка корреспонде́нции** хаттар килтереү; **заказна́я корреспонде́нция** заказлы корреспонденция **3.** (*статья*) хәбәр, хат, корреспонденция (*көндәлек ваҡиғалар тураһында гәзиткә, журналға ебәрелгән хәбәр*)

**КОРРИ́ДА** *ж* коррида (*Испанияла һәм Латин Америкаһы илдәрендә тамаша төрө: тореадорҙың үгеҙ менән һуғышы*)

**КОРРОЗИ́ЙНЫЙ** и **КОРРОЗИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тут ...ы, коррозия ...ы; **коррози́йные пя́тна** тут таптары **2.** *геол.* ашалыу ...ы, коррозия ...ы; **коррозио́нные проце́ссы** ашалыу процестары

**КОРРО́ЗИЯ** *ж* **1.** тутығыу, коррозия; **корро́зия желе́за** тимер тутығыу **2.** *геол.* ашалыу, коррозия; **корро́зия го́рных поро́д** тау тоҡомдарының ашалыуы; **корро́зия по́чвы** тупраҡ коррозияһы

**КОРРУМПИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое коррупцияға бирелгән; **коррумпи́рованный госуда́рственный де́ятель** коррупцияға бирелгән дәүләт эшмәкәре

**КОРРУ́ПЦИЯ** *ж* коррупция, һатылыу; **обвиня́ть в корру́пции** коррупцияла ғәйепләү

**КОРСА́Ж** *м* корсаж (1. *ҡатын-ҡыҙ күлдәгенең билдән өҫкө өлөшө* 2. *юбканың* (*итәктең*) *ҡаты биллеге*)

**КОРСА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое корсаж ...ы; **корса́жная ле́нта** корсаж таҫмаһы

**КОРСА́Р** *м* корсар (*диңгеҙ юлбаҫары*)

**КОРСЕ́Т** *м* корсет (*һынды матур күрһәтер өсөн эстән кейә торған тығыҙ яҫы биллек*); **носи́ть корсе́т** корсет кейеү

**КОРТ** *м*; *спорт.* корт (*теннис уйнау майҙансығы*)

**КОРТЕ́Ж** *м* кортеж (*тантаналы йөрөш*); **сва́дебный корте́ж** туй кортежы

**КО́РТИК** *м* кортик, ҡыҫҡа хәнйәр; **ко́ртик с сере́бряной рукоя́ткой** көмөш һаплы кортик

**КО́РТОЧКИ: сиде́ть на ко́рточках** сүкәйеп ултырыу; **сесть на ко́рточки** сүгеү, сүкәйеү

**КОРУ́НД** *м* корунд (*ҡаты минералдарҙың бер төрө*)

**КОРУ́НДОВЫЙ,** -ая, -ое 1. корунд ...ы; **кору́ндовое месторожде́ние** корунд ятҡылығы 2. корунд; **кору́ндовая игла́** корунд энә

**КОРЧА́ГА** *ж* ҙур сүлмәк; **корча́га со смета́ной** ҡаймаҡ һалынған ҙур сүлмәк

**КОРЧЕВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое төпләү ...ы; **корчева́льные рабо́ты** төпләү эштәре; **корчева́льная маши́на** ағас төпләгес (машина)

**КОРЧЕВА́ТЬ** *несов. что* төпләү, ҡуптарыу, төп сығарыу; **корчева́ть де́рево** ағас төпләү

**КОРЧЁВКА** *ж см.* **корчева́ть**; **корчёвка ле́са** урман төпләү

**КО́РЧИ** *мн.* (*ед.* **ко́рча** *ж*); *разг.* күҙән йыйырыу, ҡорошҡаҡ тотоу

**КО́РЧИТЬ** *несов.* 1. *кого*, *безл.* күҙән йыйырыу, тартышыу, ҡорошоу, ҡорошҡаҡ тотоу; **его́ на́чало ко́рчить** уны ҡорошҡаҡ тота башланы 2. *кого*; *разг.* ҡыланыу, ҡыланған булыу, булып ҡыланыу; **ко́рчить из себя́ знатока́** белгән кеше булып ҡыланыу ♦ **ко́рчить ро́жи** ауыҙ ҡыйшайтыу, үсекләү

**КО́РЧИТЬСЯ** *несов.* 1. күҙән йыйырыу, ҡорошҡаҡ тотоу, тартышыу; **ко́рчиться от бо́ли** һыҙланыуҙан (ауыртыуҙан) тартышыу 2. *разг.* ҡорошоу, бөгәрләнеү; **ве́тки ко́рчились в костре́** ботаҡтар усаҡта ҡороштолар

**КОРЧМА́** *ж* корчма, трактир

**КОРЧМА́РЬ** *м*; *уст.* корчма хужаһы

**КО́РШУН** *м* төйлөгән ♦ **ко́ршуном налете́ть** (**бро́ситься**) *на кого* ҡарсыға кеүек ташланыу

**КО́РШУНИЙ,** -ья, -ье төйлөгән ...ы; **ко́ршунье гнездо́** төйлөгән ояһы

**КОРЫ́СТНЫЙ,** -ая, -ое 1. файҙа (табыш) алыу ...ы; **с коры́стной це́лью** файҙа алыу уйы менән; **коры́стный интере́с** файҙа алыу ниәте менән 2. *см.* **корыстолюби́вый**

**КОРЫСТОЛЮ́БЕЦ** *м* ҡомһоҙ кеше, ас күҙ, үҙ файҙаһын ҡайғыртыусы

**КОРЫСТОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое ҡомһоҙ, туймаҫ, үҙ файҙаһын ғына күҙәткән; **корыстолюби́вый челове́к** ҡомһоҙ кеше

**КОРЫСТОЛЮ́БИЕ** *с* ҡомһоҙлоҡ, ҡомарлыҡ

**КОРЫ́СТЬ** *ж* 1. (*выгода*) файҙа, табыш 2. *см.* **корыстолю́бие**

**КОРЫ́ТО** *с* кәритә, ялғаш; **стира́ть бельё в коры́те** ялғашта кер йыуыу ♦ **оказа́ться у разби́того коры́та**; **верну́ться к разби́тому коры́ту** бер ниһеҙ тороп ҡалыу, тишек шүмәнгә ултырыу

**КОРЬ** *ж*; *мед.* ҡыҙылса; **боле́ть ко́рью** ҡыҙылса менән ауырыу

**КОРЬЁ** *с собир.* ҡайыр, ҡабыҡ; **ли́повое корьё** йүкә ҡайыры

**КОРЬЕВО́Й,** -ая, -ое ҡайыр, ҡабыҡ, ҡабыҡтан (ҡайырҙан) эшләнгән; **корьево́й наве́с** ҡабыҡтан эшләнгән лапаҫ

**КО́РЮШКА** *ж* диңгеҙ сабағы

**КОРЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое 1. кәрше, кәкре-бөкрө, сатай-ботай; **коря́вое де́рево** кәкре-бөкрө ағас 2. ҡытыршы; **коря́вые ру́ки** ҡытыршы ҡулдар 3. *перен.*, *разг.* килешһеҙ, тупаҫ; **коря́вые ри́фмы** килешһеҙ рифмалар

**КОРЯ́ГА** *ж* лапы; **крючо́к зацепи́лся за коря́гу** ҡармаҡ лапыға эләкте

**КОРЯ́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое 1. күп ботаҡлы, ботаҡлы; **коря́жистый дуб** ботаҡлы имән 2. лапылы; **лови́ть ры́бу в коря́жистых места́х** лапылы урында балыҡ тотоу

**КОРЯ́КИ** *мн.* коряктар, коряк халҡы // *ед.* **коря́к** *м* коряк ир-аты; **коря́чка** *ж* коряк ҡатын-ҡыҙы

**КОРЯ́КСКИЙ,** -ая, -ое коряк ...ы; **коря́кский язы́к** коряк теле

**КОСА́ I** *ж* толом; **заплести́ во́лосы в две косы́** сәсте ике толом итеп үреү; **дли́нная коса́** оҙон толом

**КОСА́ II** *ж* салғы; **отбива́ть косу́** салғы сүкеү; **обу́х косы́** салғы төйҙәһе; **точи́ть косу́** салғы яныу ♦ **нашла́ коса́ на ка́мень** ҡара-ҡаршы килеү, төкәшеү

**КОСА́ III** *ж* 1. ҡомайыл, ҡомаяҡ (*тупраҡ*) 2. морон (*ослайып кергән ер*); **коса́ ле́са** урман мороно

**КОСА́РЬ I** *м* бесән (ашлыҡ) сабыусы

**КОСА́РЬ II** *м* ҙур бысаҡ, кәсир; **наколо́ть косарём лучи́ны** ҙур бысаҡ менән сыра телеү (ярыу)

**КОСА́ТКА** *ж* косатка (*дельфиндар ғаиләһенә ҡараған һөтимәр эре йыртҡыс диңгеҙ хайуаны*)

**КОСА́Ч** *м* ата ҡор, оҙан

**КО́СВЕННЫЙ,** -ая, -ое ситләтелгән, туранан-тура булмаған; **ко́свенные доказа́тельства** ситләтелгән дәлилдәр; **задава́ть ко́свенные вопро́сы** ситләтелгән һорауҙар биреү ♦ **ко́свенный вопро́с** *грам.* ситләтелгән һорау; **ко́свенные вы́боры** туранан-тура булмаған һайлауҙар; **ко́свенное дополне́ние** *грам.* ситләтелгән тултырыусы; **ко́свенные нало́ги** *фин.* ситләтелгән һалым; **ко́свенные падежи́** *грам.* ҡыйыҡ килештәр; **ко́свенная речь** *грам.* ситләтелгән телмәр

**КОСЕ́КАНС** *м*; *мат.* косеканс

**КО́СИНУС** *м*; *мат.* косинус; **ко́синус угла́** мөйөштөң косинусы

**КОСИ́ТЬ I** *несов.* **1.** *что* сабыу; **он ко́сит се́но** ул бесән саба **2.** *кого-что*; *перен.* ҡырыу, һәләк итеү, үлтереү; **снаря́ды коси́ли неприя́тельские ряды́** снарядтар дошман сафын ҡырҙы

**КОСИ́ТЬ II** *несов.* **1.** *что*, *чем* (*рот*) ҡыйшайтыу, бөршәйтеү, салшайтыу **2.** ҡыйшайыу, ҡыя китеү; **борозда́ коси́т под сошнико́м** бураҙна төрән аҫтында ҡыя китте **3.** *разг.* (*об одежде, её частях*) ҡыйшайып (салшайып) тороу; **ю́бка спе́реди коси́т** итәге ал яҡтан ҡыйшайып тора **4.** *без доп.* ҡылый ҡарау; **оди́н глаз у него́ коси́т** бер күҙе ҡылый (ҡарай)

**КОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡыйшайыу, ҡырынайыу; **дверь коси́тся от сы́рости** ишек еүешлектән ҡыйшая **2.** *на кого-что* күҙ ҡырыйы (сите) менән ҡарау **3.** *на кого-что*; *перен.* тиҫкәре (ҡырын) ҡарау

**КОСИ́ЦА** *ж* **1.** *уменьш. от* **коса́** I; **2.** (*прядь волос*) сәс өлтөгө

**КОСИ́ЧКА** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **коса́** I

**КОСМА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** лаҫбыр, оҙон ҡуйы йөнлө, ялбыр; **косма́тый пёс** лаҫбыр эт; **косма́тая ша́пка** ялбыр баш кейеме **2.** туҙған, ялбыр, ялбыр сәсле; **косма́тая голова́** ялбыр баш; **косма́тые во́лосы** ялбыр сәс **3.** *перен.* ялбыр; **косма́тые облака́** ялбыр болоттар

**КОСМЕ́ТИКА** *ж* **1.** биҙәнеү, косметика; **кабине́т косме́тики** биҙәнеү кабинеты; **лече́бная косме́тика** дауалау косметикаһы **2.** *собир.* биҙәнеү әйберҙәре, косметика; **употребля́ть косме́тику** биҙәнеү әйберҙәрен ҡулланыу

**КОСМЕТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое биҙәнеү ...ы, косметика ...ы; **космети́ческая фа́брика** косметика фабрикаһы; **космети́ческие сре́дства** биҙәнеү әйберҙәре

**КОСМЕТО́ЛОГ** *м* косметолог, косметика белгесе; **врач-космето́лог** табиб-косметолог

**КОСМЕТОЛО́ГИЯ** *ж* косметология (*дауалау, бит-тәндең сафлығын һаҡлау һәм ҡиәфәткә матурлыҡ биреү хаҡындағы фән*)

**КОСМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое йыһан ...ы, космос ...ы; **косми́ческий кора́бль** йыһан карабы; **косми́ческое простра́нство** йыһан киңлеге **2.** *перен.* үтә тиҙ, ифрат ҙур, сиктән тыш; **дни пролете́ли с косми́ческой ско́ростью** көндәр бик тиҙ үтте; **косми́ческий масшта́б** ифрат ҙур масштаб; **косми́ческая си́ла** сиктән тыш көс ♦ **косми́ческая пыль** йыһан саңы (*йондоҙҙар араһындағы киңлектә томан һымаҡ булып йөрөүсе бик ваҡ киҫәктәр*); **косми́ческие лучи́** йыһан нурҙары (*Ер шарына төшкән нурҙар*)

**КОСМОВИ́ДЕНИЕ** *с* космостан телетапшырыу

**КОСМОГОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое космогония ...ы; **космогони́ческая гипо́теза** космогония гипотезаһы

**КОСМОГО́НИЯ** *ж* космогония (*күк есемдәренең барлыҡҡа килеүен һәм үҫешен өйрәнә торған бүлек*); **звёздная космого́ния** йондоҙҙар космогонияһы

**КОСМОДРО́М** *м* космодром; **постро́ить космодро́м** космодром төҙөү

**КОСМОЛО́ГИЯ** *ж* космология (*йыһан төҙөлөшө тураһында тәғлимәт*); **пробле́мы космоло́гии** космология проблемалары

**КОСМОНА́ВТ** *м* космонавт

**КОСМОНА́ВТИКА** *ж* космонавтика (*йыһанға осоу теорияһы һәм практикаһы*); **осно́вы космона́втики** космонавтика нигеҙҙәре; **бу́дущее космона́втики** космонавтиканың киләсәге

**КОСМОПОЛИ́Т** *м* и **КОСМОПОЛИ́ТКА** *ж* космополит; **преврати́ться в космополи́та** космополитҡа әйләнеү

**КОСМОПОЛИТИ́ЗМ** *м* космополитизм, космополитлыҡ (*милли традицияларҙы инҡар иткән идеология*)

**КОСМОПОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое космополитик; **космополити́ческий взгляд** космополитик ҡараш

**КО́СМОС** *м* космос, йыһан, ғаләм; **полёты в ко́смос** йыһанға осоу; **изуча́ть ко́смос** ғаләмде өйрәнеү; **вы́йти в ко́смос** йыһанға сығыу

**КО́СМЫ** *мн.* (*ед.* **косма́** *ж*) **1.** *разг.* сәс өлтөгө, таралмаған (ойпаланған) сәс; **нечёсанные ко́смы** таралмаған сәс **2.** (*о клочьях воды, облаков, тумана*) уҡмашып торған, ялбыр; **ко́смы облако́в** ялбыр болоттар

**КОСНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *в чём* и *без доп.* ҡатып ҡалыу; **косне́ть в неве́жестве** наҙанлыҡта ҡатып ҡалыу **2.** көрмәлеү; **язы́к косне́ет** тел көрмәлә

**КО́СНОСТЬ** *ж* ҡатып ҡалғанлыҡ, үҫмәү, алға бармау; **ко́сность мышле́ния** фекерләүҙең ҡатып ҡалғанлығы

**КОСНОЯЗЫ́ЧИЕ** *с* **1.** һаҡаулыҡ; **страда́ть косноязы́чием** һаҡаулыҡ менән интегеү **2.** *перен.* тел буталыуы, тотлоғоу

**КОСНОЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һаҡау; **косноязы́чный челове́к** һаҡау кеше **2.** *перен.* аңлайышһыҙ телле, теле насар; **косноязы́чная речь** насар телмәр; **косноязы́чный расска́з** теле насар хикәйә

**КОСНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **каса́ться**

**КО́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡатып ҡалған, ынтылышһыҙ; **ко́сный ум** ҡатып ҡалған аҡыл; **ко́сный челове́к** туң, ынтылышһыҙ (мәғәнәһеҙ) кеше **2.** *в знач. сущ.* **ко́сное** *с* иҫкелек, (иҫкесә) ҡатып ҡалғанлыҡ; **борьба́ но́вого с ко́сным** яңылыҡ менән иҫкелектең көрәше

**КОСОБО́КИЙ,** -ая, -ое ҡыйыш, салыш, янтайған, ауыш; **кособо́кий стари́к** ҡыйыш кәүҙәле ҡарт; **кособо́кая избу́шка** янтайған өй

**КОСОБО́ЧИТЬ** *несов.*; *разг.* ҡыйшайыу, ауышыу, салшайыу, ҡырынайыу, янтайыу

**КОСОВИ́ЦА** *ж* **1.** сабыу; **косови́ца трав** үлән сабыу **2.** (*время, когда косят*) бесән өҫтө

**КОСОВИ́ЩЕ** *с* салғы һабы; **укороти́ть косови́ще** салғы һабын ҡыҫҡартыу; **насади́ть косу́ на косови́ще** салғы ашлау, салғыға һап ҡуйыу

**КОСОВОРО́ТКА** *ж* ҡыйыҡ яғалы күлдәк

**КОСОГЛА́ЗИЕ** *с* ҡылыйлыҡ

**КОСОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡылый күҙле, ҡылый; **косогла́зый ма́льчик** ҡылый күҙле малай **2.** *разг.* (*раскосый*) ҡыҫыҡ күҙле; **косогла́зые ли́ца** ҡыҫыҡ күҙҙәр, ҡыҫыҡ күҙле кешеләр

**КОСОГО́Р** *м* сағыл, тау битләүе; **верши́на косого́ра** сағыл башы

**КОСО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡыя, ҡыялап төшкән (яуған); **косы́е лучи́ со́лнца** ҡояштың ҡыялап төшкән нурҙары; **косо́й дождь** ҡыялап яуған ямғыр; **косо́й по́черк** ҡыя яҙыу; **косо́й пробо́р** сәсте ҡыя ярыу **2.** ҡыйыш, салыш, ауыш, ҡыйшайған; **коса́я дверь** ҡыйыш ишек; **коса́я по́лка** ҡыйшайған кәштә **3.** ҡылый, ҡыйыш, ҡылый күҙле; **коса́я же́нщина** ҡылый ҡатын **4.** *перен.* ҡырын; **косо́й взгляд** ҡырын ҡараш ♦ **косо́й во́рот** ҡыйыҡ яға; **косо́й па́рус** ҡыйыҡ елкән; **косо́й треуго́льник** *мат.* ҡыйыш өсмөйөш; **косо́й у́гол** *мат.* ҡыйыш мөйөш; **коса́я са́жень в плеча́х; в косу́ю са́жень ро́стом** киң яурынлы

**КОСОЛА́ПИТЬ** *несов.* тайыш баҫыу

**КОСОЛА́ПОСТЬ** *ж* тайышлыҡ; **врождённая косола́пость** тыумыштан тайышлыҡ

**КОСОЛА́ПЫЙ,** -ая, -ое **1.** тайыш, тайыш аяҡ (табан), арҡыры аяҡ; **косола́пый медве́дь** тайыш табан айыу **2.** *перен.*, *прост.* килбәтһеҙ, шөкәтһеҙ

**КОСОРУ́КИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыйыш ҡуллы, ҡыйыш ҡул; **косору́кий челове́к** ҡыйыш ҡул кеше **2.** *перен.*, *прост.* ҡулайһыҙ, оҫолһоҙ

**КОСОУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *мат.* ҡыйыш (ҡыйыҡ) мөйөшлө; **косоуго́льный треуго́льник** ҡыйыҡ мөйөшлө өсмөйөш

**КОСТЁЛ** *м* костёл (*Польшала католиктар сиркәүе*)

**КОСТЕНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** шаҡрайыу, шоҡрайыу, ҡатыу; **спина́ костене́ет от хо́лода** арҡа һыуыҡтан шоҡрая **2.** (*от смущения, испуга и т.д.*) ҡатып ҡалыу, шаҡ ҡатыу; **костене́ть от испу́га** ҡурҡыуҙан шаҡ ҡатыу

**КОСТЁР I** *м* **1.** усаҡ, ут; **заже́чь костёр** усаҡ тоҡандырыу **2.** *горн.* (*рудничное крепление из стоек*) терәк ♦ **пионе́рский костёр** пионерҙар усағы

**КОСТЁР II** *м*; *бот.* күстерә; **безо́стый костёр** ҡылсыҡһыҙ күстерә

**КОСТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** шауҡал, эре һөйәкле; **кости́стый скот** шауҡал мал; **кости́стый мужчи́на** эре һөйәкле ир **2.** (*о рыбе*) ҡылсыҡлы; **кости́стый лещ** ҡылсыҡлы ҡорман **3.** *см.* **костля́вый** 1

**КОСТЛЯ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаҡ һөйәк, ҡаҡ һөйәккә ҡалған, үтә арыҡ (ябыҡ); **костля́вый стари́к** ҡаҡ һөйәккә ҡалған ҡарт; **костля́вая коро́ва** үтә арыҡ һыйыр **2.** *см.* **кости́стый** 2

**КО́СТНЫЙ,** -ая, -ое һөйәк ...ы; **ко́стная ткань** һөйәк туҡымаһы; **ко́стная боле́знь** һөйәк ауырыуҙары; **ко́стный клей** һөйәк елеме ♦ **ко́стный мозг** *анат.* елек; **ко́стная мозо́ль** *мед.* һөйәк йөйө

**КОСТОЕ́ДА** *ж* һөйәк сереү сире

**КОСТОПРА́В** *м* быуын ултыртыусы

**КОСТОРЕ́З** *м* һөйәктән әйбер эшләүсе

**КО́СТОЧКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **кость 2.** (*в плодах*) һөйәк, төш; **ко́сточка сли́вы** слива һөйәге ♦ **перемыва́ть ко́сточки** *кому* ғәйбәт һатыу, тетеп һалыу; **по ко́сточкам разобра́ть** *кого-что* ентекләп тикшереү

**КО́СТОЧКОВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* **1.** һөйәкле, төшлө; **ко́сточковые плоды́** һөйәкле емештәр **2.** *в знач. сущ.* **ко́сточковые** *мн.* ҡаты төшлөләр

**КОСТРА́** *ж* талҡыш; **льняна́я костра́** етен талҡышы

**КОСТРЕ́Ц** *м* **1.** ҡойроҡ һөйәге, ҡоймос **2.** (*часть мясной туши*) артҡы һан, бот ите

**КОСТРИ́КА** *ж см.* **костра́**

**КОСТРОВО́Й** *м* усаҡ яғыусы

**КОСТЫ́ЛЬ** *м* **1.** ҡултыҡ таяғы; **ходи́ть на костыля́х** ҡултыҡ таяғы менән йөрөү **2.** (*гвоздь, крюк*) ырғаҡлы сөй; **вбить косты́ль в сте́ну** стенаға ырғаҡлы сөй ҡағыу

**КОСТЬ** *ж* **1.** һөйәк; (*у рыб*) ҡылсыҡ; **бе́дренная кость** бот һөйәге; **слоно́вая кость** фил һөйәге; **резьба́ по ко́сти** һөйәктән һырлап эшләү **2.** (*игральная*) һөйәк, уйын ташы **3.** (*на счётах*) төймә ♦ **бе́лая кость** аҡ һөйәк; **чёрная кость** ҡара һөйәк; **до косте́й** бик нык; **ко́жа да ко́сти** ҡоро һөйәккә тороп ҡалған; **широ́кая кость**; **широ́к ко́стью**; **широ́к в кости́** эре һөйәкле, ҙур кәүҙәле; **до мо́зга косте́й** бөтә торошо (булмышы) менән, башынан аяғына тиклем; **язы́к без косте́й** *у кого* теле һөйәкһеҙ, теле-телгә теймәй; **пересчита́ть ко́сти** *кому* ҡабырғаһын һанау (*туҡмау*); **лечь костьми́** башын һалыу (*үлеп ҡалыу*); **на костя́х постро́ить** ҡорбандар менән төҙөү

**КОСТЮ́М** *м* костюм, кейем; **рабо́чий костю́м** эш кейеме; **выходно́й костю́м** байрам кейеме;

**брю́чный костю́м** салбарлы костюм; **карнава́льный костю́м** карнавал костюмы

**КОСТЮМЕ́Р** *м* и **КОСТЮМЕ́РША** *ж* костюмер (*театрҙа костюм әҙерләп торған кеше*)

**КОСТЮМИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое маскарад (театр) костюмлы ♦ **костюми́рованный бал** маскарад костюмлы бал

**КОСТЮМИРОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* маскарад (театр) костюмы кейҙереү

**КОСТЮМИРОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* маскарад (театр) костюмы кейеү; **костюмирова́ться на бал** балға маскарад костюмы кейеү **2.** *несов. страд. от* **костюмирова́ть**

**КОСТЯ́К** *м* **1.** һөлдә; **кру́пный костя́к** эре һөлдә **2.** *чего*; *перен.* төп өлөш; **костя́к организа́ции** ойошманың төп өлөшө

**КОСТЯНИ́КА** *ж* ҡыҙыл бөрлөгән

**КОСТЯНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл бөрлөгән ...ы; **костяни́чные ли́стья** ҡыҙыл бөрлөгән япраҡтары; **костяни́чное варе́нье** ҡыҙыл бөрлөгән ҡайнатмаһы

**КОСТЯ́НКА** *ж*; *бот.* төш, емеш эсендәге һөйәк (*сейә, муйыл, өрөк кеүек емештәрҙең һөйәге*)

**КОСТЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** һөйәк, һөйәктән яһалған; **костяны́е пу́говицы** һөйәк төймәләр; **нож с костяно́й рукоя́ткой** һөйәк һаплы бысаҡ **2.** һөйәк ...ы; **костяна́я мука́** һөйәк оно

**КОСТЯ́ШКА** *ж*; *разг.* **1.** быуын, быуын һөйәге; **костя́шка па́льцев** бармаҡтың быуын һөйәктәре **2.** һөйәк, уйын ташы; **костя́шки домино́** домино һөйәктәре **3.** (*на счётах*) төймә

**КОСУ́ЛЯ** *ж* илек; (*самка*) ҡоралай

**КОСЫ́НКА** *ж* өскөл яулыҡ, косынка; **шёлковая косы́нка** ебәк өскөл яулыҡ

**КОСЬБА́** *ж см.* **коси́ть** I 1

**КОСЯ́К I** *м* яҡ, яңаҡ; **дверно́й костя́к** ишек яңағы; **око́нный кося́к** тәҙрә яңағы

**КОСЯ́К II** *м* **1.** өйөр; **косяк лошаде́й** йылҡы өйөрө **2.** эркеү; **плывёт косяк плотвы́** сабаҡ эркеүе йөҙә **3.** *в знач. нареч.* **косяко́м**; *разг.* өйөр-өйөр булып; **наро́д ва́лит косяко́м** халыҡ өйөр-өйөр булып килә **4.** (*стая птиц*) туп; **косяки́ журавле́й** торналар тубы

**КОСЯКО́М** *нареч.*; *разг.* ҡыя, ҡыялатып; **на стол косяко́м па́дало из окна́ со́лнце** ҡояш нурҙары тәҙрә аша ҡыя төшә

**КОТ** *м* ата бесәй ♦ **кот напла́кал** *кого-чего* тырнаҡ осондай, бик әҙ; **кот в мешке́** билдәһеҙ нәмә; **кота́ в мешке́ купи́ть** күҙ йомоп һатып алыу, әйберҙе күрмәйенсә алыу

**КОТА́НГЕНС** *м*; *мат.* котангенс

**КОТЁЛ** *м* **1.** ҡаҙан; **чугу́нный котёл** суйын ҡаҙан; **парово́й котёл** боҫ (пар) ҡаҙаны **2.** *воен.* ҡамау; **попа́сть в котёл** ҡамауға эләгеү ♦ **о́бщий котёл** дөйөм (күмәк) туҡланыу, күмәкләп тотоноу; **(как) в котле́ кипе́ть** баш ҡайнатып йөрөү; **вари́ться в котле́** бер ҡаҙанда ҡайнау (*оҙаҡ йылдар бер коллективта эшләү*)

**КОТЕЛО́К** *м* котелок (**1.** *ялан шарттарында аш-һыу өсөн тотолған тимер һауыт* **2.** *түңәрәк түбәле ҡаты эшләпә*); **подве́сить котело́к на трено́жник** котелокты тағанға аҫыу; **наде́ть котело́к** котелок кейеү ♦ **котело́к ва́рит** *у кого* башы эшләй

**КОТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаҙан ...ы; **коте́льный цех** ҡаҙан цехы; **коте́льное желе́зо** ҡаҙан тимере **2.** *в знач. сущ.* **коте́льная** *ж* ҡаҙанлыҡ бүлмәһе, пар ҡаҙандары урынлашҡан урын

**КОТЕ́ЛЬЩИК** *м* **1.** ҡаҙан яһаусы **2.** боҫ (пар) ҡаҙаны белгесе

**КОТЁНОК** *м* бесәй балаһы

**КО́ТИК** *м* **1.** *уменьш.-ласк. от* **кот 2.** *зоол.* диңгеҙ бесәйе, котик

**КО́ТИКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** котик ...ы, диңгеҙ бесәйе ...ы; **ко́тиковый про́мысел** котик аулау кәсебе **2.** котик (тиреһенән эшләнгән); **ко́тиковая ша́пка** котик бүрек

**КОТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *фин.* котировкалау, хаҡ ҡуйыу (*биржа тауарҙарына, процентлы ҡағыҙҙарға һәм сит ил валютаһына*)

**КОТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *фин.* котировкаланыу, хаҡ ҡуйылыу **2.** баһаланыу, юғары күтәрелеү; **его́ выска́зывания высоко́ коти́руются** уның әйткәндәре бик юғары баһалана **3.** *фин.* биржала йөрөү (әйләнеү) **4.** *страд. от* **коти́ровать**

**КОТИРО́ВКА** *ж*; *фин.* **1.** *см.* **коти́ровать, коти́роваться 2.** котировка (*биржала тауар, процентлы ҡағыҙҙар әйләнеше*)

**КОТИ́ТЬСЯ** *несов.* (*о кошке, зайчихе*) балалау; (*о козе, овце*) бәрәсләү

**КОТЛЕ́ТА** *ж* котлет; **жа́рить котле́ты** котлет ҡурыу; **парова́я котле́та** боҫта (парҙа) бешерелгән котлет; **карто́фельная котле́та** картуф котлеты

**КОТЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое котлетлыҡ; **котле́тный фарш** котлетлыҡ фарш

**КОТЛОВА́Н** *м* нигеҙ соҡоро, котлован; **рыть котлова́н** нигеҙ соҡоро ҡаҙыу

**КОТЛОВИ́НА** *ж* соҡор, һөҙәк соҡор; **боло́тистая котлови́на** һаҙамыҡ соҡор

**КОТО́МКА** *ж* юл тоҡсайы, биштәр, артмаҡ

**КОТО́РЫЙ,** -ая, -ое *мест.* **1.** (*какой именно*) ҡайһы, ҡайһыныһы; **в кото́рые две́ри он вошёл?** ул ҡайһы ишеккә инде?; **кото́рый из них?** уларҙың ҡайһынһы? **2.** (*какой по порядку, по счёту*) нисәнсе, күпме; **кото́рый час?** сәғәт нисә? **3.** (*не первый, многий*; *обычно в сочетании с сущ. "раз", "день", "год" и т.п.*) нисә, нисәнсе, күпме; **кото́рый раз я тебе́ э́то говорю́** нисәнсе тапҡыр инде һиңә был турала әйтәм

**КОТО́РЫЙ-НИБУДЬ,** -ая-нибудь, -ое-нибудь *мест.*; *разг.* (*какой-нибудь из нескольких*) береһе, берәйһе, араһынан бере

**КОТТЕ́ДЖ** *м* коттедж (1. *ҡала ситендәге ике ҡатлы бер ғаиләлек йорт* 2. *туристар өсөн тәғәйенләнгән йәйге йорт*)

**КО́ФЕ** *м нескл.* ҡәһүә, кофе; **мо́лотый ко́фе** тартылған ҡәһүә; **пить ко́фе** ҡәһүә эсеү

**КОФЕВА́РКА** *ж* ҡәһүә (кофе) ҡайнатҡыс; **вари́ть в кофева́рке** ҡәһүә ҡайнатҡыста ҡайнатыу

**КОФЕИ́Н** *м* кофеин (*ҡәһүә орлоҡтарынан, сәй япраҡтарынан һ.б. ҡайһы бер үҫемлектәрҙән алына торған наркотик матдә*)

**КОФЕ́ЙНИК** *м* кофейник, ҡәһүә сәйнүге; **нали́ть ко́фе из кофе́йника** кофейниктан ҡәһүә ҡойоу

**КОФЕ́ЙНИЦА** *ж* 1. ҡәһүә тирмәне; **моло́ть зёрна кофе́йницей** ҡәһүә тирмәнендә ҡәһүә тарттырыу 2. ҡәһүә һауыты

**КОФЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое 1. ҡәһүә ...ы; **кофе́йные планта́ции** ҡәһүә плантациялары; **кофе́йные зёрна** ҡәһүә орлоҡтары 2. ҡәһүәле; **кофе́йный торт** ҡәһүәле торт; **кофе́йный крем** ҡәһүәле крем 3. (*о цвете*) ҡәһүә төҫлө (төҫөндәге); **ту́фли кофе́йного цве́та** ҡәһүә төҫөндәге туфли

**КОФЕ́ЙНЯ** *ж* кофейня, ҡәһүәхана

**КОФЕМО́ЛКА** *ж* ҡәһүә тартҡыс

**КО́ФТА** *ж* кофта; **шерстяна́я ко́фта** йөн кофта; **ко́фта с коро́ткими рукава́ми** ҡыҫҡа еңле кофта

**КО́ФТОЧКА** *ж*; *уменьш. от* **ко́фта**

**КОЧА́Н** *м* күсән; **коча́н капу́сты** кәбеҫтә күсәне

**КОЧА́ННЫЙ,** -ая, -ое күсәнле; **коча́нная капу́ста** күсәнле кәбеҫтә

**КОЧЕВА́ТЬ** *несов.* 1. (*вести кочевой образ жизни*) күсмә тормошта йәшәү 2. *разг.* (*часто менять местожительство*) күсеү, күсеп йөрөү

**КОЧЁВКА** *ж* 1. *см.* **кочева́ть** 2. *см.* **коче́вье** 2, 3

**КОЧЕ́ВНИКИ** *мн.* (*ед.* **коче́вник** *м*) күсмә халыҡ, күскенселәр; **гру́ппа коче́вников** күскенселәр төркөмө

**КОЧЕВО́Й,** -ая, -ое 1. күсмә; **кочевы́е наро́ды** күсмә халыҡтар; **кочево́й о́браз жи́зни** күсмә тормош 2. күскенселәр ...ы, күсмә халыҡ ...ы; **кочева́я ю́рта** күскенселәр тирмәһе

**КОЧЕ́ВЬЕ** *с* 1. *см.* **кочева́ть** I; 2. (*стоянка*) ҡуналҡа 3. (*местность*) күсеп йөрөү урыны; **ле́тнее коче́вье** йәйләү; **зи́мнее коче́вье** ҡышлау

**КОЧЕГА́Р** *м* кочегар; **кочега́р паровбзной то́пки** паровоз кочегары

**КОЧЕГА́РКА** *ж* кочегарка (*пар ҡаҙаны урынлашҡан һәм уға яға торған бүлмә*); **рабо́тать в кочега́рке** кочегаркала эшләү

**КОЧЕНЕ́ТЬ** *несов.* туңыу, ҡатыу, ныҡ өшөү; **от хо́лода кочене́ют но́ги** һыуыҡтан аяҡ(тар) туңа

**КОЧЕРГА́** *ж* тәртешкә, болғауыс; **разгреба́ть у́гли кочерго́й** күмерҙе тәртешкә менән болғатыу

**КОЧЕРЫ́ЖКА** *ж* күсән үҙәге; **грызть кочеры́жку** күсән үҙәген кимереү

**КО́ЧКА** *ж* түңгәк; **наступи́ть на ко́чку** түңгәккә баҫыу

**КОЧКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое түңгәкле; **кочкова́тый луг** түңгәкле болон

**КОШ** *м* 1. тирмә; **башки́рские ко́ши** башҡорт тирмәләре 2. кош, тораҡ (*XI—XVI бб. Рәсәйҙә хәрби лагерь, ылау*)

**КОША́РА** *ж* аран; **загна́ть ове́ц в коша́ру** һарыҡтарҙы аранға индереү

**КОША́ЧИЙ** и **КО́ШЕЧИЙ,** -ья, -ье 1. бесәй ...ы; **коша́чья ла́па** бесәй табаны; **коша́чий мех** бесәй тиреһе; **коша́чьи глаза́** бесәй күҙҙәре 2. *разг.* бесәй (тиреһенән эшләнгән); **коша́чий воротни́к** бесәй яға 3. *в знач. сущ.* **коша́чьи** *мн.*; *зоол.* бесәйҙәр, бесәй һымаҡтар ♦ **коша́чий конце́рт** бесәйҙәр мыяулауы

**КОШЕЛЁК** *м* аҡса янсығы, янсыҡ; **положи́ть де́ньги в кошелёк** янсыҡҡа аҡса һалыу

**КОШЁЛКА** *ж*; *разг.* кәшүл (*үреп эшләнгән сумка, кәрзин*)

**КОШЕНИ́ЛЬ** *ж* кошениль (1. *ҡыҙыл буяу бирә торған бөжәк* 2. *шул бөжәктән алынған буяу*)

**КОШЕНИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кошениль ...ы; **кошени́льный черве́ц** кошениль ҡорто; **кошени́льная кра́ска** кошениль буяуы

**КО́ШЕНЫЙ,** -ая, -ое сабылған; **ко́шеный луг** сабылған болон; **ко́шеный овёс** сабылған һоло; **ко́шеное се́но** сабылған бесән

**КО́ШКА** *ж* 1. бесәй; **се́рая ко́шка** һоро бесәй 2. *обычно мн.* **ко́шки**; *спец.* тырнаҡтар (*бағанаға менеү өсөн*); **наде́ть ко́шки** тырнаҡтар кейеү ♦ **как ко́шка с соба́кой** эт менән бесәй кеүек; **ко́шки скребу́т на душе́** йөрәкте өйкәп тороу, эс бошоу; **ко́шка пробежа́ла ме́жду** *кем* араларынан ҡара бесәй үткән

**КОШМА́** *ж* кейеҙ; **покры́тый кошмо́й пол** кейеҙ түшәлгән иҙән

**КОШМА́Р** *м* 1. ҡурҡыныс төш, баҫлығыу; **его́ му́чают кошма́ры** уны ҡурҡыныс төштәр яфалай (ыҙалата) 2. *перен.*, *разг.* дәһшәт, алама (бик насар, эшәке) нәмә; **кошма́р фаши́зма** фашизм дәһшәте 3. *в знач. сказ.*; *разг.* ҡот осҡос, бик яман; **там тако́е твори́тся — кошма́р!** унда шундай хәл булып ята — ҡот осҡос!

**КОШМА́РНЫЙ,** -ая, -ое 1. ҡурҡыныс, ҡот осҡос, бик яман; **кошма́рный сон** бик яман төш 2. *перен.*, *разг.* бик насар (алама); **кошма́рные усло́вия** бик насар шарттар; **сего́дня кошма́рная пого́да** бөгөн көн бик алама (насар)

**КОЩЕ́Й** *м* 1. *фольк.* Кощей (*урыҫ халыҡ әкиәттәрендә мифик зат*) 2. *разг.* (*о тощем и высоком человеке*) ҡаҡ һөйәк, ябыҡ оҙон кеше

**КОЩУ́НСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое мыҫҡыллы, мәсхәрәле; **кощу́нственные ре́чи** мәсхәрәле телмәрҙәр

**КОЩУ́НСТВО** *с* мыҫҡыл, мәсхәрә

**КОЩУ́НСТВОВАТЬ** *несов.* мыҫҡыл (мәсхәрә) итеү, мәсхәрәләү, мыҫҡыллау

**КОЭФФИЦИЕ́НТ** *м*; *мат.*, *физ.* коэффициент ♦ **коэффицие́нт поле́зного де́йствия** файҙалы эш коэффициенты

**КРАБ** *м* диңгеҙ ҡыҫалаһы, краб

**КРА́БИЙ,** -ья, -ье диңгеҙ ҡыҫалаһы ...ы; **кра́бье мя́со** диңгеҙ ҡыҫалаһы ите

**КРА́БОВЫЙ,** -ая, -ое (*связанный с добычей крабов*) диңгеҙ ҡыҫалаһы ...ы; **кра́бовый про́мысел** диңгеҙ ҡыҫалаһы аулау кәсебе; **кра́бовые се́ти** диңгеҙ ҡыҫалаһы ауы

**КРАБОЛО́В** *м* **1.** диңгеҙ ҡыҫалаһы аусыһы **2.** диңгеҙ ҡыҫалаһын тотоп эшкәртеүсе карап

**КРА́ВЧИЙ** *м*; *ист.* кравчий (*Мәскәү батшаларының ашнаҡсыһы*)

**КРА́ГИ** *мн.* краги (**1.** *күндән эшләнгән балтырлы ҡуныс* **2.** *бирсәткәнең киң оҙон беләҙеге*)

**КРА́ДЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урланған; **кра́деные ве́щи** урланған әйберҙәр **2.** *в знач. сущ.* **кра́деное** *с собир.* урланған нәмәләр

**КРА́ДУЧИСЬ** *нареч.*; *разг.* боҫоп, йәшерен, һиҙҙермәҫтән; **кра́дучись вы́йти из до́ма** өйҙән йәшерен сығыу

**КРАЕВЕ́Д** *м* тыуған яҡты өйрәнеүсе (*белгес*)

**КРАЕВЕ́ДЕНИЕ** *с* илде өйрәнеү, тыуған яҡты (ерҙе) өйрәнеү

**КРАЕВЕ́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое тыуған яҡты (төйәкте) өйрәнеү ...ы; **краеве́дческий музе́й** тыуған яҡты өйрәнеү музейы

**КРАЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** край ...ы; **краево́й суд** край суды; **краево́й прокуро́р** край прокуроры **2.** *спец.* ҡырындағы, ситендәге; **краевы́е тре́щины ледника́** боҙлоҡ ситендәге ярыҡтар

**КРАЕУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* төп, нигеҙ, иң мөһим; **краеуго́льный вопро́с** төп мәсьәлә ♦ **краеуго́льный ка́мень** *чего* эштең төп нигеҙе (асылы)

**КРА́ЕШЕК** *м*; *разг.* сит, ҡыр; **сесть на кра́ешек сту́ла** ултырғыстың ситенә ултырыу

**КРА́ЖА** *ж* урлау, урлыҡ, урлашыу; **ме́лкая кра́жа** ваҡ-төйәк урлау; **кра́жа со взло́мом** ватып инеп урлау

**КРА́Й** *м* **1.** сит, ҡыр, тирә; **край стола́** өҫтәл ҡыры; **на са́мом краю́** иң ситтә; **сесть на край сту́ла** ултырғыс ситенә ултырыу **2.** мөлдөрәмә, ҡыр; **напо́лни стака́н до краёв** стаканды мөлдөрәмә тултырыу; **ли́ться че́рез край** ҡырынан түгелеп ташыу **3.** ер, яҡ; **родно́й край** тыуған яҡ; **тёплые края́** йылы яҡтар **4.** край; **Краснода́рский край** Краснодар крайы ♦ **с краю́** ситтән; **че́рез край** бик күп, артығы менән; **из края́ в край** бер ситтән икенсе ситкә тиклем; **на край све́та** ҡош та осоп етмәҫ ергә (ер сигенә); **на краю́ све́та** йәһәннәм ситендә; **на краю́ ги́бели** ҡыл өҫтөндә; **хвати́ть че́рез край** арттырып (аштырып) ебәреү; **слы́шать кра́ем у́ха** ҡолаҡҡа салыныу, ишетеп ҡалыу

**КРА́ЙНЕ** *нареч.* (*чрезвычайно*) бик, үтә, сиктән тыш; **кра́йне безобра́зен** бик йәмһеҙ; **я кра́йне удивлён** мин сиктән тыш ғәжәпләндем; **кра́йне поле́зное де́ло** үтә файҙалы эш

**КРА́ЙНИЙ,** -яя, -ее **1.** ситке, ситтәге; **кра́йний дом по у́лице** урам буйлап ситке өй; **кра́йнее окно́** ситтәге тәҙрә **2.** (*наиболее отдалённый*) алыҫ, йыраҡ; **жить на Кра́йнем Се́вере** Алыҫ Төньяҡта йәшәү **3.** (*предельный*) иң һуңғы (аҙаҡҡы); **кра́йний срок** иң һуңғы срок **4.** (*исключительный*) һуңғы сиктәге, һуң дәрәжәләге; **кра́йняя нужда́** һуң дәрәжәләге ихтыяж **5.** (*наиболее радикальный*) иң, ныҡ, киҫкен; **кра́йний реакционе́р** нык реакционер; **кра́йнее мне́ние** киҫкен фекер ♦ **кра́йние ме́ры** киҫкен саралар; **в кра́йнем слу́чае** һуңғы сиктә, бер ҙә булмағанда; **по кра́йней ме́ре** һәр хәлдә, һис юғында

**КРА́ЙНОСТЬ** *ж* **1.** сик, ахыр, һуңғы (аҡтыҡ) сик; **избега́ть кра́йностей** аҡтыҡ сиктәрҙән арыныу (ҡасыу) **2.** *перен.* ҡаршылыҡ, ҡапма-ҡаршылыҡ; **в его́ хара́ктере сочета́ются две кра́йности** уның холҡонда ике ҡапма-ҡаршылыҡ ята **3.** (*очень тяжёлое положение*) ауыр хәл, мохтажлыҡ, һуңғы сик; **огóнь открыва́ть то́лько в кра́йности!** утты тик һуңғы сиктә генә асырға! ♦ **в кра́йности** кәрәк булғанда; **до кра́йности** бик, үтә, ғәҙәттән (саманан) тыш; **довести́ (дойти́) до кра́йности** сығырынан сығарыу

**КРАКОВЯ́К** *м* краковяк (*поляктарҙың милли бейеүе һәм шуның көйө*)

**КРАМО́ЛА** *ж*; *уст.* фетнә

**КРАМО́ЛЬНИК** *м*; *уст.* фетнәсе

**КРАМО́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *уст.* фетнә ойоштороу

**КРАМО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *уст.* фетнә ...ы, фетнәсел; **крамо́льный дух** фетнәсел рух

**КРАН I** *м* һеҙәк, морон, кран; **водопрово́дный кран** һыу үткәргес краны; **самова́рный кран** самауыр һеҙәге; **закры́ть кран** һеҙәкте ябыу

**КРАН II** *м*; *тех.* кран; **подъёмный кран** күтәргес кран

**КРАНИОЛО́ГИЯ** *ж* краниология (*кешенең һәм хайуандарҙың баш һөйәген өйрәнгән сағыштырма анатомия фәненең бүлеге*)

**КРАНИОМЕ́ТРИЯ** *ж*; *анат.* краниометрия (*баш һөйәген үлсәү*)

**КРАНОВЩИ́К** *м* и **КРАНОВЩИ́ЦА** *ж* крансы, кранда эшләүсе

**КРАП** *м* **1.** (*мелкие пятна*) бөрсөк, тап; **бе́лый мра́мор с се́рым кра́пом** һоро таплы аҡ мәрмәр **2.** (*расцветка*) сыбар биҙәк, төрткө

**КРА́ПАТЬ** *несов.* **1.** һибәләү, һибәләп яуыу; **дождь кра́пает** ямғыр һибәләй **2.** *что* сыбарлау, төрткөләү

**КРАПИ́ВА** *ж* кесерткән ♦ **глуха́я крапи́ва** һуҡыр кесерткән (*киртләс япраҡлы, йөнтәҫ һабаҡлы, ваҡ ҡына алһыу сәскәле саҡмай торған дарыу үләне*)

**КРАПИ́ВНИК** *м* **1.** *бот.* кесерткәнлек **2.** *зоол.* кесерткән турғайы

**КРАПИ́ВНИЦА** *ж* **1.** *мед.* ыуа, кесерткән биҙгәге **2.** *зоол.* кесерткән күбәләге

**КРАПИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое кесерткән ...ы; **крапи́вные за́росли** кесерткән араһы; **крапи́вные щи** кесерткән ашы ♦ **крапи́вная лихора́дка** *мед.* кесерткән биҙгәге (*тәнде сабырттыра, нык ҡысындыра торған ауырыу*)

**КРА́ПИНА** и **КРА́ПИНКА** *ж* төрткө; **га́лстук в кра́пинку** төрткөлө галстук

**КРАПЛЁНЫЙ,** -ая, -ое (*о картах*) тамғалы, билдә ҡуйылған; **краплёные ка́рты** билдә ҡуйылған кәрттәр

**КРА́ПЧАТЫЙ,** -ая, -ое бөрсөк төшкән, төрткөлө, сыбар; **кра́пчатая косы́нка** бөрсөк төшкән яулыҡ; **кра́пчатая ку́рица** сыбар тауыҡ

**КРАСА́** *ж* **1.** *трад.-поэт.* (*красота*) матурлыҡ, йәмлелек, күркәмлек, гүзәллек; **краса́ небе́с** күктең матурлығы; **же́нская краса́** ҡатын-ҡыҙ күркәмлеге **2.** *чего*; *высок.* (*украшение*) күрк, йәм; **краса́ и го́рдость нау́ки** фәндең күрке һәм ғорурлығы **3.** *трад.-поэт.* һылыу ҡыҙ ♦ **во всей (свое́й) красе́** *ирон.* үҙенең бөтә кире яҡтары менән; **для красы́** матурлыҡ өсөн

**КРАСА́ВЕЦ** *м* **1.** матур егет **2.** матур, күркәм, гүзәл; **краса́вец-го́род** матур ҡала

**КРАСА́ВИЦА** *ж* **1.** (*о женщине*) матур (һылыу, сибәр, күркәм) ҡатын-ҡыҙ; **она́ — удиви́тельная краса́вица** ул — ғәжәп матур ҡатын (ҡыҙ) **2.** (*в обращении*) һылыуҡай **3.** матур; **краса́вица-зо́рька** матур таң

**КРАСА́ВКА** *ж* эт сейәһе, бүре еләге

**КРАСА́ВЧИК** *м*; *разг.*, *ласк.* *от* **краса́вец** 1

**КРАСИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** матур, һылыу, сибәр; **краси́вый цвето́к** матур сәскә; **краси́вая де́вушка** сибәр (һылыу) ҡыҙ; **краси́вое ле́то** матур йәй; **краси́вый го́лос** матур тауыш **2.** (*о внутреннем содержании*) күркәм, гүзәл, матур; **краси́вый посту́пок** күркәм эш; **краси́вая жизнь** матур тормош **3.** ялтырауыҡлы, матур; **краси́вые слова́** ялтырауыҡлы һүҙҙәр

**КРАСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое буяу ...ы; **краси́льный цех** буяу цехы; **краси́льные вещества́** буяу матдәләре; **краси́льные расте́ния** буяу үләндәре (үҫемлектәре)

**КРАСИ́ЛЬНЯ** *ж* буяу оҫтаханаһы

**КРАСИ́ЛЬЩИК** *м* и **КРАСИ́ЛЬЩИЦА** *ж* буяусы

**КРАСИ́ТЕЛЬ** *м* буяу, буяғыс; **натура́льный краси́тель** тәбиғи буяу; **синтети́ческий краси́тель** яһалма (синтетик) буяу

**КРА́СИТЬ** *сов.* **1.** *что* буяу; **кра́сить пол** иҙән буяу; **кра́сить гу́бы** ирен буяу **2.** *кого-что* биҙәү, матурлау; **улы́бка кра́сит его́** йылмайыу уны матурлай

**КРА́СИТЬСЯ** *несов.* **1.** буялыу, буяу һеңеү (инеү); **бе́лое ле́гче всего́ кра́сится** аҡ нәмә яҡшы буяла; **э́тот материа́л хорошо́ кра́сится** был туҡымаға буяу яҡшы инә **2.** *разг.* (*пачкать*) буяу йоғоу, буялыу; **дверь ещё кра́сится** ишектең буяуы һаман йоға **3.** (*подкрашивать лицо, губы и т.д.*) буяныу, биҙәнеү; **де́вушка кра́сится** ҡыҙ биҙәнә **4.** *страд.* *от* **кра́сить** 1

**КРА́СКА** *ж* **1.** буяу, шал (буяҡ); **зелёная кра́ска** йәшел буяу; **ма́сляная кра́ска** майлы буяу; **акваре́льная кра́ска** акварель буяу **2.** *обычно мн.* **кра́ски** буяуҙар, төҫтәр, биҙәктәр; **я́ркие кра́ски пейза́жа** тәбиғәт күренешенең асыҡ буяуҙары **3.** *обычно мн.* **кра́ски**; *перен.* тасуирлау, һүрәтләү; **описа́ть в я́рких кра́сках** асыҡ тасуирлап һөйләп биреү **4.** (*румянец*) ҡыҙыллыҡ, алһыулыҡ; **кра́ска бро́силась ему́ в лицо́** битенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе

**КРАСНЕ́ТЬ** *несов.* **1.** ҡыҙарыу; **ви́шни нача́ли красне́ть** сәйәләр ҡыҙара башланы **2.** (*от прилива крови к коже*) ҡыҙарыу, ҡыҙарыныу; **у́ши красне́ют** ҡолаҡтар ҡыҙара; **красне́ть от волне́ния** тулҡынланыуҙан ҡыҙарыныу **3.** *перен.* оялып ҡыҙарыу; **красне́ть пе́ред людьми́** кешеләр алдында оялып ҡыҙарыу **4.** ҡыҙарып күренеү; **на его́ лице́ красне́л рубе́ц** уның битендә бирсә ҡыҙарып күренә ине ♦ **красне́ть до корне́й воло́с** оялыуҙан сәс төптәренә тиклем ҡыҙарыу

**КРАСНЕ́ТЬСЯ** *несов.* *от* **красне́ть** 4

**КРАСНО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡыҙыл" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.*, **красногру́дый** ҡыҙыл түшле

**КРАСНОАРМЕ́ЕЦ** *м* ҡыҙылармеец, Ҡыҙыл Армия һалдаты

**КРАСНОБА́Й** *м*; *пренебр.* таҫма тел

**КРАСНОБА́ЙСТВО** *с*; *пренебр.* таҫма теллелек, күп һүҙлелек

**КРАСНОГВАРДЕ́ЕЦ** *м* ҡыҙылгвардеец, ҡыҙылгвардиясы

**КРАСНОДЕРЕ́ВЕЦ** и **КРАСНОДЕРЕ́ВЩИК** *м* ағас оҫтаһы (*киммәтле йыһаз эшләүсе*)

**КРАСНОЗВЁЗДНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл йондоҙло; **краснозвёздный самолёт** ҡыҙыл йондоҙло самолёт

**КРАСНОЗЁМ** *м* ҡыҙыл тупраҡ

**КРАСНОЗЁМНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл тупраҡлы; **краснозёмная по́чва** ҡыҙыл тупраҡлы ер

**КРАСНОЗНАМЁННЫЙ,** -ая, -ое Ҡыҙыл Байраҡ орденлы; **краснознамённый полк** Ҡыҙыл Байраҡ орденлы полк

**КРАСНОКО́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡыҙыл тәнле **2.** *в знач. сущ.* **краснoко́жие** *мн.* (*об индейцах Америки*) индеецтар

**КРАСНОКРЫ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл ҡанатлы

**КРАСНОЛЕ́СЬЕ** *с* ылыҫлы урман

**КРАСНОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ее ҡыҙыл битле; **красноли́цый па́рень** ҡыҙыл битле егет

**КРАСНОНО́СЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыл танаулы ♦ **красноно́сый нырo̍к** *зоол.* ерәнсәй сумғалаҡ өйрәк

**КРАСНОПЁРКА** *ж* ҡыҙылғанат (*балыҡ*)

**КРАСНОРЕЧИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҫта телле; **красноречи́вый собесе́дник** оҫта (телсәр) әңгәмәсе **2.** *перен.* мәғәнәле; **красноречи́вый взгляд** мәғәнәле ҡараш **3.** *перен.* асыҡ, асыҡ, иҫбатланған; **красноречи́вые фа́кты** иҫбатланған дәлилдәр

**КРАСНОРЕ́ЧИЕ** *с* һүҙгә оҫталыҡ, оҫта теллелек; **сла́виться красноре́чием** һүҙгә оҫталыҡ менән дан тотоу

**КРАСНОТА́** *ж* ҡыҙыллыҡ; **краснота́ лица́** бит ҡыҙыллығы

**КРАСНОТА́Л** *м* ҡыҙыл тал

**КРАСНОФЛО́ТЕЦ** *м* ҡыҙылфлотсы

**КРАСНОЩЁКИЙ,** -ая, -ое алһыу битле; **краснощёкая де́вушка** алһыу битле ҡыҙ

**КРАСНУ́ХА** *ж*; *мед.* ҡыҙылса, ҡыҙамыҡ

**КРА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙыл; **кра́сная кра́ска** ҡыҙыл буяу; **кра́сное я́блоко** ҡыҙыл алма **2.** *в знач. сущ.* **кра́сные** *мн.* ҡыҙылдар; **кра́сные за́няли го́род** ҡыҙылдар ҡаланы алды **3.** *трад.-поэт.* (*ясный, радостный*) яҡты, аяҙ, саф; **кра́сное со́лнышко** яҡты ҡояш; **день был кра́сный** көн аяҙ, матур ине **4.** *спец.* ҡиммәтле (аҫыл, затлы) сорт (тоҡом) ♦ **кра́сная ры́ба** ҡыҙыл балыҡ (бикре һымаҡтар); **кра́сная дичь** затлы тиреле йәнлектәр; **Кра́сная А́рмия** Ҡыҙыл Армия; **кра́сное вино́** ҡыҙыл шарап; **Кра́сная гва́рдия** Ҡыҙыл гвардия; **кра́сный гриб** *бот.* уҫаҡ бәшмәге; **кра́сная де́вица** *см.* **де́вица**; **кра́сное де́рево** ҡыҙыл ағас (*мебель яһау өсөн ҡулланылған ҡиммәтле ағас*); **кра́сное словцо́** тапҡыр һүҙ; **кра́сная строка́** яңы (ҡыҙыл) юл; **кра́сный у́гол** ҡыҙыл мөйөш; **кра́сная цена́** иң юғары хаҡ; **кра́сной ни́тью проходи́ть** ҡыҙыл еп булып үтеү (*бөрәй фекерҙең асыҡ булып айырылып тороуы*); **пусти́ть кра́сного петуха́** ҡыҙыл этәс ебәреү, ут һалыу (төртөү)

**КРАСОВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** матур булыу, күренеп тороу; **на голове́ де́вочки красова́лся ба́нтик** ҡыҙҙың башындағы бантик бик матур ине **2.** *разг.* күренеү; **вдали́ красова́лись верши́ны гор** алыҫта тау түбәләре күренде **3.** (*любоваться собой*) үҙен күрһәтеү (*маҡтаныу йәһәтенән*)

**КРАСОТА́** *ж*; *в разн. знач.* матурлыҡ, һылыулыҡ, гүзәллек; **красота́ приро́ды** тәбиғәттең матурлығы; **та́йны красоты́** гүзәллектең серҙәре; **прида́ть красоту́** матурлыҡ биреү; **красо́ты родно́й страны́** тыуған илдең матурлыҡтары

**КРАСО́ТКА** *ж*; *разг.* матурҡай, сибәркәй, аҫыл ҡош

**КРА́СОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** буяу ...ы; **кра́сочный цех** буяу цехы **2.** төҫлө, буяу менән эшләнгән; **кра́сочная табли́ца** төҫлө таблица; **кра́сочный портре́т** буяу менән эшләнгән портрет **3.** *перен.* тәьҫир итерлек (ҡалдырырлыҡ), матур; **кра́сочный та́нец** тәьҫир итерлек бейеү; **кра́сочный язы́к** матур тел

**КРАСТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* урлау; **красть ве́щи** әйбер урлау **2.** урлашыу

**КРА́СТЬСЯ** *несов.* боҫоп (һиҙҙермәй генә, йәшеренеп) барыу (килеү); **кра́сться, как вор** бур шикелле боҫоп барыу

**КРА́СЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **кра́сить** 1; **2.** *прил.* буяу ...ы; **кра́сящие вещества́** буяусы матдәләр

**КРАТ: во́ сто крат** йөҙ тапҡыр; **во мно́го крат** күп тапҡыр

**КРА́ТЕР** *м* кратер (*янартау ауыҙы*)

**КРА́ТКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҫҡа, аҙ ғына; **кра́ткая встре́ча** ҡыҫҡа осрашыу; **кра́ткий разгово́р** аҙ ғына һөйләшеү **2.** *лингв.* ҡыҫҡа; **кра́ткие гла́сные** ҡыҫҡа һуҙынҡылар **3.** (*о дороге*) ҡыҫҡа; **кра́ткий путь** ҡыҫҡа юл **4.** (*сжатый*) ҡыҫҡартылған, ҡыҫҡаса; **кра́ткий отчёт** ҡыҫҡаса отчёт; **кра́ткие прилага́тельные**; **кра́ткие фо́рмы прилага́тельных** *грам.* сифаттың ҡыҫҡартылған формаһы; **быть кра́тким** аҙ һүҙле булыу

**КРАТКОВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа ваҡытлы; **кратковре́менный о́тдых** ҡыҫҡа ваҡытлы ял

**КРАТКОСРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа (срок-лы) мөҙҙәтле; **краткосро́чный о́тпуск** ҡыҫҡа мөҙҙәтле ял; **краткосро́чный заём** ҡыҫҡа мөҙҙәтле заем

**КРА́ТКОСТЬ** *ж* ҡыҫҡалыҡ

**КРА́ТНОСТЬ** *ж*; *мат.* ҡалдыҡһыҙ бүленеүсәнлек

**КРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое *мат.* **1.** ҡалдыҡһыҙ бүленеүсән; **кра́тное число́** ҡалдыҡһыҙ бүленгән һан **2.** *в знач. сущ.* **кра́тное** *с* ҡалдыҡһыҙ бүленеүсе; **кра́тное да́нного числа́** бирелгән һандың ҡалдыҡһыҙ бүленеүсеһе

**КРАХ** *м* **1.** бөлөү; **крах ба́нка** банкының бөлөүе **2.** *перен.* юҡҡа сығыу, емерелеү; **его́ пла́ны потерпе́ли крах** уның пландары юҡҡа сыҡты

**КРАХМА́Л** *м* крахмал; **карто́фельный крахма́л** картуф крахмалы

**КРАХМА́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое крахмалға бай, крахмаллы; **крахма́листые сорта́ карто́феля** картуфтың крахмалға бай сорттары

**КРАХМА́ЛИТЬ** *несов.* *что* крахмаллау; **крахма́лить ска́терть** ашъяулыҡты крахмаллау

**КРАХМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** крахмал ...ы; **крахма́льный заво́д** крахмал заводы; **крахма́льный кле́йстер** крахмал елеме **2.** крахмалланған; **крахма́льная ска́терть** крахмалланған ашъяулыҡ

**КРА́ЧКА** *ж* сарлаҡ; **белокры́лая кра́чка** аҡҡанат сарлаҡ; **речна́я кра́чка** йылға сарлағы; **чайконо́сая кра́чка** кереләәк сарлаҡ

**КРА́ШЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** буялған; **кра́шеный пол** буялған иҙән; **кра́шеные во́лосы** буялған сәс **2.** *разг.* биҙәнгән, буянған, яһанған, төҙәнгән; **кра́шеная же́нщина** биҙәнгән ҡатын

**КРАЮ́ХА** и *уменьш.* **КРАЮ́ШКА** *ж*; *разг.* ҡыйыр, ҡыйырсыҡ; **краю́ха хле́ба** икмәк ҡыйыры

**КРЕВЕ́ТКА** *ж* креветка (*ашарға яраҡлы диңгеҙ ҡыҫалаһы*)

**КРЕДИ́Т** *м*; *бухг.* кредит (*керем-сығым кенәгәһенең бөтә сығым һәм бурыс яҙыла торған уң яҡ бите*)

**КРЕДИ́Т** *м* кредит (**1.** *аҡсаны йәки тауарҙы көтәсәккә биреүгә нигеҙләнгән алыш-биреш* **2.** *фин. ниндәйҙер кәрәк өсөн бюджетта ҡаралған аҡса*) ♦ **госуда́рственный креди́т** дәүләт кредиты (*дәүләт заёмдарының бер системаһы*); **в креди́т** үтескә

**КРЕДИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое кредит ...ы; **креди́тный биле́т** кредит билеты; **креди́тные опера́ции** кредит операциялары

**КРЕДИТОВА́НИЕ** *с см.* **кредитова́ть**

**КРЕДИТОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* **1.** бурысҡа (кредитҡа) биреү; **е́сли де́нег нет, могу́ кредитова́ть** әгәр аҡсаң булмаһа, бурысҡа бирә алам **2.** *фин.* кредитлау, кредит биреү, кредитҡа алыу; **кредитова́ть строи́тельство** төҙөлөшкә кредит биреү

**КРЕДИТОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* бурысҡа (кредитҡа) алыу (алып тороу) **2.** *несов. страд. от* **кредитова́ть**

**КРЕДИТО́Р** *м* бурысҡа биреүсе, кредитор

**КРЕДИТОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое бурыс түләүгә һәләтле, кредит ҡайтарыуға һәләтле; **кредитоспосо́бный челове́к** бурыс түләүгә һәләтле кеше

**КРЕ́ДО** *с нескл., книжн.* ҡараш, фекер; **полити́ческое кре́до** сәйәси ҡараш; **нау́чное кре́до** фәнни ҡараш; **изложи́ть своё кре́до** үҙ ҡарашынды әйтеү

**КРЕ́ЙСЕР** *м* крейсер (*ҙур һуғыш карабы*); **лёгкий кре́йсер** еңел крейсер; **раке́тный кре́йсер** ракеталы крейсер

**КРЕ́ЙСЕРСКИЙ,** -ая, -ое крейсер ...ы; **кре́йсерская эска́дра** крейсер эскадраһы ♦ **кре́йсерская ско́рость** *спец.* крейсер тиҙлеге (*самолёт йәки караптың уртаса тиҙлеге*)

**КРЕЙСИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** йөрөп тороу, йөрөү; **крейси́ровать ме́жду порта́ми** порттар араһында йөрөү **2.** *воен.* күҙәтеп (һаҡлап) тороу; **крейси́ровать зали́в** ҡултыҡты күҙәтеп тороу

**КРЕ́КИНГ** *м*; *тех.* **1.** нефть эшкәртеү, крекинг **2.** крекинг (*нефть эшкәртеү ҡоролмаһы*)

**КРЕКИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* нефть эшкәртеү, крекинглау

**КРЕМ** *м*; *в разн. знач.* крем; **кофе́йный крем** ҡәһүәле крем; **крем для рук** ҡул кремы (кершәне); **сапо́жный крем** итек кремы

**КРЕМАТО́РИЙ** *м* крематорий (*мәйет яндырыу бинаһы*)

**КРЕМАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое кремация ...ы, мәйет яндырыу ...ы; **кремацио́нная печь** мәйет яндырыу мейесе

**КРЕМА́ЦИЯ** *ж* кремация, мәйет яндырыу (*махсус мейестә*)

**КРЕМЕ́НЬ** *м* **1.** саҡматаш **2.** *разг.* (*о человеке*) ҡорос кеше

**КРЕМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* кремациялау, мәйетте яндырыу

**КРЕМЛЁВСКИЙ,** -ая, -ое кремль ...ы; **кремлёвские воро́та** кремль ҡапҡалары

**КРЕМЛЬ** *м* кремль (*боронғо урыҫ ҡалалары эсендәге ҡәлғә*)

**КРЕМНЁВЫЙ,** -ая, -ое **1.** саҡматаш ...ы; **кремнёвая глы́ба** ҙур саҡматаш киҫәге **2.** саҡматаш, саҡматаштан эшләнгән; **кремнёвые ору́дия** саҡматаш ҡоралдар **3.** саҡматашлы; **кремнёвое ружьё** саҡматашлы мылтыҡ **4.** *перен.* ҡаты, ныҡ; **кремнёвый хара́ктер** ҡаты холоҡ

**КРЕМНЕЗЁМ** *м*; *мин.* кремнезём (*кремнийҙың кислород менән ҡатышмаһы*)

**КРЕ́МНИЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** кремний ...ы; **кре́мниевая кислота́** кремний кислотаһы **2.** кремнийлы; **кре́мниевые со́ли** кремнийлы тоҙҙар

**КРЕ́МНИЙ** *м* кремний (*химик элемент*)

**КРЕМНИ́СТЫЙ I,** -ая, -ое **1.** ташлы; **кремни́стый путь** ташлы юл **2.** *перен.* ныҡ, ныҡлы; **кремни́стый челове́к** ныҡ кеше

**КРЕМНИ́СТЫЙ II,** -ая, -ое **1.** кремний ...ы; **кремни́стые соедине́ния** кремний берләшмәләре **2.** кремнийлы; **кремни́стая сталь** кремнийлы ҡорос **3.** кремнезёмлы, кремнезёмдан торған; **кремни́стые поро́ды** кремнезёмлы тоҡомдар

**КРЕ́МОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** кремлы; **кре́мовое пиро́жное** кремлы пирожный **2.** (*о цвете*) һарғылт аҡ; **кре́мовый цвет** һарғылт аҡ төҫ

**КРЕН** *м* **1.** ҡырынайыу, ҡыйшайыу; **дать крен впра́во** уң яҡҡа ҡырынайыу **2.** *перен.* боролоу, тайпылыу

**КРЕ́НДЕЛЬ** *м* **1.** керәндил **2.** *в знач. нареч.* **кре́нделем** бөгөлөп; **лежа́ть кре́нделем** бөгөлөп ятыу ♦ **выде́лывать кренделя́** ян-яҡҡа аушанлап (алпан-толпан) атлау; **выки́дывать кренделя́** бейегәндә хикмәтле хәрәкәттәр ҡыҫтырып ебәреү

**КРЕ́НДЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое керәндил ...ы; **кре́ндельное те́сто** керәндил ҡамыры

**КРЕНИ́ТЬ** *несов. что* ҡыйшайтыу, ҡырынайтыу; **крени́ть де́рево** ағасты ҡыйшайтыу; **крени́ть ло́дку** кәмәне ҡырынайтыу

**КРЕНИ́ТЬСЯ** *несов.* ҡырынайыу, ҡыйшайыу; **су́дно крени́тся** судно ҡырыная

**КРЕОЗО́Т** *м* креозот (*ағас йәки таш күмер дегетен томалап ҡыуыу юлы менән алынған матдә*)

**КРЕО́Л** *м* креол; **крео́лка** *ж* креол ҡатын-ҡыҙы (**1.** *Испаниянан һәм Португалиянан Ла-*

*тин Американына кусеп ултырган колонизаторҙар тоҡомо* **2.** *испан менән индеецтан, урыҫ менән алеут йәки эскимостан тыуған кеше)*

**КРЕП** *м* креп (**1.** *сираҡ ептән ҡытыршы итеп һуғылған ебәк йәки йөн туҡыма* **2.** *үтә күренмәле һырлы ҡара туҡыма)*

**КРЕПДЕШИ́Н** *м* крепдешин (*туҡыма*); **набивно́й крепдеши́н** үҙенән биҙәк сыҡҡан крепдешин

**КРЕПДЕШИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое крепдешин; **крепдеши́новое пла́тье** крепдешин күлдәк

**КРЕПЁЖ** *м* **1.** *тех.* беркетеү деталдәре (*болттар, штативтар һ.б.*) **2.** *горн.* нығытма материалдары (*ҡаҙылма байлыҡ сығарылған урынды нығытыу өсөн*)

**КРЕПЁЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *тех.* беркетеү ...ы; **крепёжные болты́** беркетеү болттары **2.** *горн.* нығытыу ...ы; **крепёжный лес** нығытыу ағасы

**КРЕПИ́ЛЬЩИК** *м* нығытыусы, таяу һуғыусы

**КРЕПИ́ТЬ** *несов. что* **1.** нығытыу, беркетеү; **крепи́ть рельс к шпа́лам** шпалдарға рельсты беркетеү **2.** *горн.* нығытмалар ҡуйыу, нығытыу; **крепи́ть забо́й** забойға нығытмалар ҡуйыу **3.** *мор., ав.* нығытып бәйләү, бәйләп ҡуйыу; **крепи́ть паруса́** елкәндәрҙе нығытып бәйләү **4.** *перен.* нығытыу, көсәйтеү; **крепи́ть дру́жбу** дуҫлыҡты нығытыу; **крепи́ть связь** бәйләнеште көсәйтеү **5.** эсте ҡатырыу; **черни́чный кисе́ль крепи́т** ҡара көртмәле кеҫәл эсте ҡатыра

**КРЕПИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** сыҙау, түҙеү, ныҡ тороу; **крепи́тесь!** ныҡ тороғоҙ! **2.** *страд. от* **крепи́ть** 1—3

**КРЕ́ПКИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаты, ныҡ, баҙыҡ; **кре́пкое де́рево** ҡаты ағас; **кре́пкий оре́х** ҡаты сәтләүек **2.** (*здоровый, сильный*) ныҡлы, таҙа; **кре́пкий органи́зм** ныҡлы организм; **кре́пкий ребёнок** ныҡлы бала **3.** (*стойкий*) ныҡ, тотороҡло; **кре́пкий челове́к** ныҡ кеше **4.** (*надёжный*) ышаныслы, ныҡлы; **кре́пкое сло́во** ышаныслы һүҙ **5.** (*о голосе, чувствах*) көслө; **кре́пкий го́лос** көслө тауыш; **кре́пкая любо́вь** көслө мөхәббәт **6.** (*достигающий сильной степени*) ҡаты, көслө; **кре́пкий моро́з** ҡаты һыуыҡ; **кре́пкий ве́тер** көслө ел **7.** (*насыщенный*) ҡаты, ҡуйы, ҡеүәтле; **кре́пкий чай** ҡаты сәй; **кре́пкий раство́р** ҡуйы иретмә; **кре́пкий кумы́с** ҡеүәтле ҡымыҙ **8.** *разг.* хәлле, иркен йәшәгән; **кре́пкое хозя́йство** хәлле хужалыҡ ♦ **кре́пкая во́дка** ҡеүәтле араҡы; **кре́пкие напи́тки** ҡеүәтле эсемлектәр; **кре́пкое сло́во** һүгенеү һүҙе, әсе һүҙ; **кре́пкий сон** ҡаты йоҡо; **кре́пок на́ ухо** ҡолаҡҡа ҡаты

**КРЕПКОГОЛО́ВЫЙ** и **КРЕПКОЛО́БЫЙ,** -ая, -ое *разг.* үҙһүҙле, еңмеш, ҡарышҡаҡ, тиҫкәре; **крепколо́бый челове́к** үҙһүҙле кеше

**КРЕПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **крепи́ть** 1—3; **2.** *см.* **крепь 3.** беркеткес; **крепле́ние лыж** саңғы беркеткесе

**КРЕПЛЁНЫЙ,** -ая, -ое спирт ҡушылған; **креплёное вино́** спирт ҡушылған шарап

**КРЕ́ПНУТЬ** *несов.* нығыу, көсәйеү, нығыныу, хәлләнеү; **те́ло кре́пло** тән нығынды; **его́ тала́нт с года́ми рос и креп** йылдар үтеү менән уның таланты үҫте һәм көсәйҙе; **больно́й с ка́ждым днём кре́пнет** ауырыу көндән-көн хәлләнә бара

**КРЕ́ПОВЫЙ,** -ая, -ое креп; **кре́повое пла́тье** креп күлдәк

**КРЕПОСТНИ́К** *м*; *ист.* крепостник (*крепостнойлыҡ хоҡуғын яҡлаған алпауыт*)

**КРЕПОСТНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *ист.* крепостник ...ы, крепостнойлыҡ ...ы; **крепостни́ческие взгля́ды** крепостнойлыҡ ҡарашы; **крепостни́ческое хозя́йство** крепостник хужалығы

**КРЕПОСТНИ́ЧЕСТВО** *с*; *ист.* крепостнойлыҡ (**1.** *йәмғиәт ҡоролошо* **2.** *крепостниктың ҡарашы, дөйөм фекере*)

**КРЕПОСТНО́Й I,** -ая, -ое *ист.* **1.** крепостной; **крепостно́е хозя́йство** крепостной хужалыҡ; **крепостно́й крестья́нин** крепостной крәҫтиән; **крепостно́й худо́жник** крепостной рәссам **2.** *в знач. сущ.* **крепостно́й** *м* и **крепостна́я** *ж* крепостной ♦ **крепостно́е пра́во** крепостнойлыҡ хоҡуғы

**КРЕПОСТНО́Й II,** -ая, -ое ҡәлғә ...ы; **крепостны́е сте́ны** ҡәлғә диуарҙары

**КРЕ́ПОСТЬ I** *ж* **1.** ныҡлыҡ; **кре́пость мета́лла** металдың ныҡлығы **2.** көслөлөк; **кре́пость ду́ха** рух көсө **3.** ҡуйылыҡ, көслөлөк, ҡатылыҡ, көс; **кре́пость вина́** шараптың көсө; **кре́пость ча́я** сәйҙең ҡатылығы

**КРЕ́ПОСТЬ II** *ж* ҡәлғә, нығытма; **оса́да кре́пости** ҡәлғәне ҡамау

**КРЕПЧА́ТЬ** *несов.* нығыу, көсәйеү; **моро́з крепча́ет** һыуыҡ көсәйә

**КРЕПЫ́Ш** *м*; *разг.* ныҡ, таҙа (*гәҙиттә, балаға ҡарата*)

**КРЕПЬ** *ж*; *горн.* нығытма; **сру́бная крепь** бурап яһалған нығытма

**КРЕ́СЛО** *с* кресло; **мя́гкое кре́сло** йомшаҡ кресло

**КРЕ́СЛО-КРОВА́ТЬ** *с* яҙылмалы (һуҙылмалы) кресло

**КРЕСТ** *м* **1.** тәре; **нате́льный крест** муйынға аҫылмалы тәре; **деревя́нный крест** ағас тәре **2.** (*молитвенный жест*) суҡыныу; **католи́ческий крест** католиктар суҡыныуы **3.** *перен.* яҙмыш, өлөш; **тяжёлый крест** ауыр яҙмыш; **нести́ свой крест** үҙ яҙмышыңа буйһоноп (риза булып) йәшәү **4.** (*метка*) крест, тамға; **поста́вить крест** крест ҡуйыу **5.** (*вид шитья*) сатраш; **вышива́ть кресто́м** сатрашлап сигеү **6.** *в знач. нареч.* **кресто́м** арҡыры; **сложи́ть ру́ки кресто́м** ҡулдарҙы арҡыры ҡуйыу ♦ **и́стинный крест!**; **вот те крест!** тәре менән ант (итеү)!; **поста́вить**

**крест** *на ком-чём* бөткән тип иҫәпләү, өмөттө өҙөү; **целова́ть крест** тәре үбеп ант итеү

**КРЕСТЕ́Ц** *м*; *анат.* һигеҙгүҙ

**КРЕСТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое суҡындырыу ...ы; **крести́льный обря́д** суҡындырыу йолаһы

**КРЕСТИ́НЫ** *только мн.* **1.** суҡындырыу йолаһы **2.** исем туйы

**КРЕСТИ́ТЬ 1.** *сов., несов. кого* (*совершить обряд*) суҡындырыу **2.** *несов.*; *перен., книжн.* һыналыу; **крещён в тяжёлом бою́** ауыр һуғышта һыналған **3.** *несов.* исем инәһе (атаһы) булыу; **она́ крести́ла их сы́на** ул уларҙың улына исем инәһе булды ♦ **не дете́й крести́ть** *кому, с кем* ҡоҙа-ҡоҙағый түгел әле, туғанлашырға йыйынмайым

**КРЕСТИ́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* (*подвергнуться обряду крещения*) суҡындырылыу **2.** *несов.* (*крестить себя*) суҡыныу; **крести́ться пе́ред ико́ной** икона алдында суҡыныу

**КРЕСТ-НА́КРЕСТ** *нареч.* (*крестообразно*) арҡыс-торҡос, арҡыры-буй, асамай; **соединя́ть крест-на́крест** арҡыс-торҡос тоташтырыу; **положи́ть крест-на́крест** арҡыры-буйға һалыу

**КРЕ́СТНИК** *м* исем улы; **кре́стница** *ж* исем ҡыҙы (*исем атаһына һәм инәһенә ҡарата*)

**КРЕ́СТНЫЙ: кре́стное зна́мение** суҡыныу; **кре́стное целова́ние** *ист.* тәре үбеп ант итеү; **кре́стный ход** иконалар, тәреләр күтәреп йөрөү

**КРЁСТНЫЙ: крёстный оте́ц** исем атаһы; **крёстная мать** исем инәһе (әсәһе); **крёстный сын** *см.* **кре́стник**; **крёстная дочь** *см.* **кре́стница**

**КРЕСТОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое әүернә рәүешле; **крестови́дная щель** әүернә кеүек ярыҡ

**КРЕСТОВИ́К** *м* әүернәле үрмәксе

**КРЕСТОВИ́НА** *ж* **1.** әүернә, асамай; **крестови́на для ёлки** шыршы әүернәһе **2.** *ж.-д.* крестовина (*рельстарҙы бер юлдан икенсе юлға күсерец өсөн эшләнгән ҡорал*)

**КРЕСТО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәре ...ы; **кресто́вая верёвка** тәре бауы **2.** сатраш, әүернә кеүек; **кресто́вый свод** сатраш көмбәҙ; **кресто́вая кла́дка** әүернә кеүек стена һалыу ♦ **кресто́вые похо́ды** *ист.* тәре походтары

**КРЕСТОНО́СЕЦ** *м* **1.** *ист.* тәре походында ҡатнашыусы **2.** *зоол.* әүернәле ҡуңыҙ

**КРЕСТООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **крестови́дный**

**КРЕСТОЦВЕ́ТНЫЕ** *мн.*; *бот.* әүернә сәскәлеләр

**КРЕСТЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое *анат.* һигеҙгүҙ ...ы; **крестцо́вая кость** һигеҙгүҙ һөйәге

**КРЕСТЬЯ́НИН** *м* и **КРЕСТЬЯ́НКА** *ж* крәҫтиән

**КРЕСТЬЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое крәҫтиән(дәр) ...ы; **крестья́нский труд** крәҫтиән хеҙмәте

**КРЕСТЬЯ́НСТВО** *с* крәҫтиәндәр

**КРЕСТЬЯ́НСТВОВАТЬ** *несов.* иген игеү, игенселек менән шөғөлләнеү

**КРЕТИ́Н** *м* **1.** *мед.* кретин (*кретинизм менән ауырыған кеше*) **2.** *прост., бран.* миңрәү

**КРЕТИНИ́ЗМ** *м* **1.** *мед.* кретинизм (*ҡалҡан биҙҙәренең етлекмәгән булыуынан килгән ауырыу*) **2.** *перен.* миңрәүлек

**КРЕТО́Н** *м* кретон (*туҡыма*)

**КРЕ́ЧЕТ** *м* (*самец*) шоңҡар; (*самка*) әтәлге; **кре́чет бе́лый** аҡ шоңҡар, тойғон; **запуска́ть кре́чета** шоңҡар сөйөү

**КРЕЩЕ́НИЕ** *с* **1.** суҡындырыу **2.** *перен.* беренсе һынау, тәүге һабаҡ; **боево́е креще́ние** беренсе тапҡыр һуғышҡа инеү **3.** (*праздник*) Крещение (*христиандарҙың дини байрамы*)

**КРЕЩЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое Крещение ...ы; **в креще́нский день вы́пал снег** Крещение көнө ҡар яуҙы ♦ **креще́нские моро́зы (холода́)** крещение һыуыҡтары (*ғинуарҙың икенсе яртыһындағы һыуыҡ көндәр*)

**КРЕЩЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** суҡынған, керәшен; **крещёный тата́рин** керәшен татар **2.** *в знач. сущ.* **крещёный** *м*; *прост., уст.* керәшен

**КРИ́ВДА** *ж*; *трад.-поэт.* ялған

**КРИВИЗНА́** *ж* **1.** кәкрелек, салышлыҡ, ҡыйшайыу; **кривизна́ руки́** ҡулдың кәкрелеге; **кривизна́ пове́рхности** яҫылыҡтың кәкрелеге **2.** (*кривое место*) кәкрәйгән (салшайған) урын, бөгөм, бөгәл; **стеса́ть кривизну́ доски́** таҡтаның кәкрәйгән ерен йышыу

**КРИВИ́ТЬ** *несов. что* ҡыйшайтыу, кәкрәйтеү, салшайтыу; **криви́ть рот** ауыҙҙы ҡыйшайтыу ♦ **криви́ть душо́й** алдашыу

**КРИВИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡыйшайыу, кәкрәйеү, салшайыу, ҡалтайыу; **пол из сыры́х до́сок криви́тся** кипмәгән таҡтанан түшәлгән иҙән ҡалтая **2.** *разг.* (*делать гримасу*) сырай һытыу, сырылыу, сирышыу; **криви́ться от зубно́й бо́ли** теш һыҙлауҙан сирылыу

**КРИВЛЯ́КА** *м* и *ж*; *разг.* ҡылансыҡ, боршанлаҡ

**КРИВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* ҡыланыу, ҡылансыҡланыу, боршанлау; **на́до же так кривля́ться** абау, ҡайһылай ҡыланған була; **де́вушка кривля́лась** ҡыҙ иркәләнеп боршанланы

**КРИВО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ҡыйыш", "кәкре" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **кривоно́гий** ҡыйыш аяҡлы; **криворо́гий** ҡыйыш (кәкре) мөгөҙлө

**ЛЕЖА́ТЬ** *несов.* **1.** ятыу; **лежа́ть на траве́** үләндә ятыу **2.** (*быть больным*) сирләп ятыу, сирләү; **лежа́ть с головно́й бо́лью** баш ауыртып ятыу **3.** (*находиться где-л., храниться*) ятыу, тороу, булыу; **кни́га лежи́т на столе́** китап өҫтәлдә ята **4.** (*располагаться тем или иным образом*) ятыу, тороу; **во́лосы хорошо́ лежа́т** сәс һәйбәт ята **5.** (*простираться*) ятыу, урынлашыу; **го́род лежи́т на берегу́ мо́ря** ҡала диңгеҙ буйында урынлашҡан **6.** (*пролегать, проходить*) үтеү; **доро́га лежи́т че́рез мост** юл күпер аша үтә **7.** *на ком*; *перен.* (*об обязанностях, заботах и т.д.*) төшөү, булыу, йөкмәтелеү; **э́та обя́занность лежи́т на ней** был вазифа уға йөкмәтелгән ♦ **душа́ (се́рдце) не лежи́т** *к кому-чему-л.* күңел тартмай (ятмай); **лежа́ть в осно́ве** *чего-л.* бер нәмәнең нигеҙендә ятыу; **лежа́ть на боку́ (на печи́)** ҡырын ятыу, бот күтәреп ятыу; **пло́хо лежи́т** күренеп ята, йыйып ҡуйылмаған; **лежа́ть под сукно́м** ҡаралмай оҙаҡ ятыу

**ЛЕЖА́ТЬСЯ: не лежи́тся (не лежа́лось)** *кому* ятҡы килмәй; **мне не лежи́тся** ятҡым килмәй

**ЛЕЖА́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** йығылған, ауған, ятҡан; **лежа́чие дере́вья** йығылған ағастар; **в лежа́чем положе́нии** ятҡан хәлдә; **лежа́чий больно́й** ятып ауырыған кеше **2.** ята торған; **лежа́чее ме́сто** ята торған урын **3.** *в знач. сущ.* **лежа́чий** *м* и **лежа́чая** *ж* түшәктә ятҡан ауырыу, аяҡтан йығылып ятыусы

**ЛЕ́ЖБИЩЕ** *с* ятыу, туплау, саңлау

**ЛЕЖЕБО́КА** *м* и *ж*; *разг.* иренсәк, ялҡау

**ЛЁЖКА** *ж* **1.** *прост.* оҙаҡ һаҡлау (ятҡырыу); **отобра́ть я́блоки для лёжки** һаҡлау өсөн алмалар һайлау, ҡуйыу **2.** ятыу; **лёжка волко́в** бүре ятыуы

**ЛЕЖМЯ́: лежмя́ лежа́ть** *прост.* ҡуҙғалмай ятыу

**ЛЕ́ЗВИЕ** *с* **1.** (*режущая часть орудия*) йөҙ, асалаҡ; **ле́звие ножа́** бысаҡ йөҙө **2.** *разг.* (*для безопасной бритвы*) лезвие; **о́строе ле́звие** үткер лезвие

**ЛЕЗГИНКА I** *ж см.* **лезги́ны**

**ЛЕЗГИ́НКА II** *ж* лезгинка (*Кавказ халҡы бейеүе һәм шул бейеүҙең көйө*)

**ЛЕЗГИ́НСКИЙ,** -ая, -ое лезгин(дар) ...ы; **лезги́нский язы́к** лезгин теле

**ЛЕЗГИ́НЫ** *мн.* лезгиндар, лезгин халҡы // *ед.* **лезги́н** *м* лезгин ир-аты; **лезги́нка** *ж* лезгин ҡатын-ҡыҙы

**ЛЕЗТЬ** *несов.* **1.** менеү, үрмәләү, үрмәләп менеү; **лезть на́ гору** тауға менеү **2.** (*входить, проникать*) инеү, кереү, төшөү; **лезть в во́ду** һыуға төшөү; **лезть в окно́** тәҙрәнән инеү **3.** *разг.* (*вмешиваться во что-л.*) ҡыҫылыу, тығылыу, ҡатышыу; **лезть не в своё де́ло** кеше эшенә ҡыҫылыу **4.** *разг.* (*приставать к кому-л.*) бәйләнеү, тотоноп китеү **5.** *разг.* (*выпадать, расползаться*) ҡойолоу, сығыу, йолоу; **во́лосы ле́зут** сәс ҡойола; **шерсть ле́зет** йөн йолой **6.** *разг.* (*быть впору*) инеү, һыйыу, таман булыу; **сапоги́ не ле́зут** итек һыймай; **кни́га не ле́зет в портфе́ль** китап портфелгә һыймай **7.** (*сползать, надвигаться*) төшөү, сығыу (сығып тороу), һыпырылыу; **из-под платка́ ле́зли во́лосы** яулыҡ аҫтынан сәстәре сығып тора ине **8.** *разг.* (ҡалҡып) сығып килеү; **из земли́ ле́зет весе́нная тра́вка** ерҙә яҙғы үлән сығып килә **9.** *разг.* тығылыу; **лезть в карма́н**

кеҫәгә тығылыу ♦ **лезть в буты́лку** *прост.* урынһыҙ ҡыҙып (буштан-бушҡа асыуланып) барыу; **лезть на глаза́** *кому* күренергә тырышыу; **лезть на рожо́н** *прост.* хәүефле, ҡурҡыныс эшхәлгә тотоноу; **лезть на́ стену** күтәрелеп бәрелеү

**ЛЕЙ** *м* и **ЛЕ́Я** *ж* лей (*Румыния аҡса берәмеге*)

**ЛЕЙБ-ГВА́РДИЯ** *ж*; *ист.*, *воен.* лейб-гвардия (*батшаның цҙ ғәскәре, һарай гвардияһы*)

**ЛЕЙБОРИ́СТ** *м* лейборист (*лейбористар партияһы ағзаһы*)

**ЛЕЙБОРИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое лейборист, лейбористар …ы; **лейбори́стская па́ртия** лейбористар партияһы

**ЛЕ́ЙКА I** *ж* һыу һипкес, һиптергес; **полива́ть цветы́ ле́йкой** сәскәләргә һиптергес менән һыу һибеү

**ЛЕ́ЙКА II** *ж*; *разг.* лейка (*фотоаппараттың бер төрө*)

**ЛЕЙКЕМИ́Я** *ж*; *мед. см.* **белокро́вие**

**ЛЕЙКО́З** *м*; *мед. см.* **белокро́вие**

**ЛЕЙКОЦИ́ТЫ** *мн.* (*ед.* **лейкоци́т** *м*); *физиол.* лейкоциттар, ҡандағы аҡ тәнсәләр

**ЛЕЙТЕНА́НТ** *м*; *воен.* лейтенант; **мла́дший лейтена́нт** кесе лейтенант; **ста́рший лейтена́нт** өлкән лейтенант

**ЛЕЙТЕНА́НТСКИЙ,** -ая, -ое лейтенант …ы, лейтенантлыҡ …ы; **лейтена́нтские пого́ны** лейтенант погондары

**ЛЕЙТМОТИ́В** *м* **1.** *муз.* лейтмотив, төп көй (*музыка әҫәрҙәрендә бер нисә тапҡыр ҡабатланған һәм әҫәрҙең темаһын тәшкил иткән төп көй*) **2.** *перен.* төп фекер; **лейтмоти́в произведе́ния** әҫәрҙең төп фекере

**ЛЕК** *м* лек (*Албания аҡса берәмеге*)

**ЛЕКА́ЛО** *с* лекало (**1.** *кәкре һыҙыҡтар яһау өсөн махсус ҡулайлама* **2.** *кейем-һалым теккәндә ҡулланылған махсус өлгө, ҡалып*)

**ЛЕКА́ЛЬЩИК** *м* лекальщик, лекалолар яһаусы

**ЛЕКА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое дауа, дарыу …ы; **лека́рственные тра́вы** дарыу үләндәре

**ЛЕКА́РСТВО** *с* **1.** (*медикамент*) дарыу; **де́лать лека́рство** дарыу яһау; **лека́рство от головно́й бо́ли** баш дарыуы **2.** *перен.* дауа, им, дарман

**ЛЕ́КАРЬ** *м*; *уст.* табип

**ЛЕ́КСИКА** *ж* лексика, һүҙлек составы; **ле́ксика башки́рского языка́** башҡорт теленең лексикаһы; **ле́ксика М.Кари́ма** М.Кәрим лексикаһы; **профессиона́льная ле́ксика** профессиональ лексика

**ЛЕКСИКО́ГРАФ** *м* лексикограф, һүҙлексе (*лексикография өлкәһендәге белгес*)

**ЛЕКСИКОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое лексикографик, лексикография …ы, лексикографияға ҡараған; **лексикографи́ческая рабо́та** лексикография эше

**ЛЕКСИКОГРА́ФИЯ** *ж* лексикография (*һүҙлектәр төҙөү теорияһы һәм эше*)

**ЛЕКСИКО́ЛОГ** *м* лексиколог, лексикология белгесе

**ЛЕКСИКОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое лексикологик, лексикология буйынса; **лексикологи́ческие рабо́ты** лексикология буйынса хеҙмәттәр

**ЛЕКСИКОЛО́ГИЯ** *ж* лексикология (*тел ғилемендә телдең лексик составын өйрәнеү бүлеге*)

**ЛЕКСИКО́Н** *м* **1.** (*запас слов*) һүҙ байлығы (запасы) **2.** *уст.* (*словарь*) лөғәт, һүҙлек

**ЛЕКСИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое лексик …ы, һүҙ …ы; **лекси́ческое бога́тство языка́** телдең лексик байлығы

**ЛЕ́КТОР** *м* лектор, лекциялар уҡыусы

**ЛЕКТО́РИЙ** *м* лекторий; **центра́льный лекто́рий о́бщества "Зна́ние"** "Белем" йәмғиәтенең үҙәк лекторийы

**ЛЕ́КТОРСКИЙ,** -ая, -ое лектор …ы, лекторлыҡ; **ле́кторская гру́ппа** лекторҙар төркөмө

**ЛЕКЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое лекция …ы; **лекцио́нный зал** лекция залы

**ЛЕ́КЦИЯ** *ж* **1.** лекция; **ле́кция о междунаро́дном положе́нии** халыҡ-ара хәл тураһында лекция; **чита́ть ле́кцию** лекция уҡыу **2.** *мн.* **ле́кции** (*курс*) лекциялар

**ЛЕЛЕ́ЯТЬ** *несов. кого-что* **1.** (*заботливо ухаживать, нежить*) иркәләү, ҡәҙерләү, наҙлау; **мать леле́ет сы́на** әсә улын иркәләй **2.** *перен.* (*услаждать*) күңелләндереү, күңелде асыу ♦ **леле́ять мечту́** хыялланыу, хыял итеү; **леле́ять наде́жду** өмөтләнеү, өмөт итеү

**ЛЕ́МЕХ** и **ЛЕМЕ́Х** *м* төрән (*һабанда*); **плуг с двумя́ ле́мехами** ике төрәнле һабан

**ЛЕМЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое төрәнле; **леме́шные ору́дия** төрәнле ҡоралдар

**ЛЕ́ММА** *м*; *мат.* лемма, ярҙамсы теорема (*цҙенең айырым әһәмиәте булмаған*)

**ЛЁН** *м* (*растение и волокно*) етен; **лён-долгуне́ц** оҙон етен; **лён-кудря́ш** бөҙрә етен; **прясть лён** етен иләү; **теребить лён** етен тарау; **мять лён** етен талҡыу ♦ **го́рный лён** *мин.* тау етене

**ЛЕНИ́ВЕЦ** *м* **1.** *разг.* ялҡау ир-ат **2.** *зоол.* ленивец (*маймылға оҡшаш тропик урман йәнлеге*)

**ЛЕНИ́ВИЦА** *ж*; *разг.* ялҡау ҡатын-ҡыҙ

**ЛЕНИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялҡау, иренсәк; **лени́вый челове́к** ялҡау кеше **2.** (*вялый, медлительный — о походке и т.п.*) әкрен, һүлпән; **лени́вые движе́ния** һүлпән хәрәкәттәр **3.** (*о лошади*) сабан, үшән; **лени́вый конь** сабан ат ♦ **лени́вые варе́ники** тиҙ-тиҙ генә бешерелгән сүсбәрә

**ЛЕНИ́ТЬСЯ** *несов.* ялҡауланыу, йыбаныу, иренеү; **лени́ться писа́ть письмо́** хат яҙырға йыбаныу

**ЛЕ́НОСТЬ** *ж* ялҡаулыҡ, иренсәклек

**ЛЕ́НТА** *ж*; *в разн. знач.* таҫма; **шёлковая ле́нта** ебәк таҫма; **с телета́йпной ле́нты** телетайп таҫмаһынан; **изоляцио́нная ле́нта** изоляция

таçмаһы ♦ **ви́ться ле́нтой** таçмалай һуҙылыу (*йылға, юл һ.б.*)

**ЛЕНТООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое таçма һымаҡ

**ЛЕ́НТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** таçма …ы; **ле́нточный цех** таçма цехы **2.** (*в форме ленты*) таçма …ы; **ле́нточная пила́** таçма бысҡы; **ле́нточные че́рви** *зоол.* таçма селәүсендәр

**ЛЕНТЯ́Й** *м* и **ЛЕНТЯ́ЙКА** *ж*; *разг.* ялҡау, иренсәк; **отъя́вленный лентя́й** ата ялҡау

**ЛЕНТЯ́ЙНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ялҡауланыу, иренеү, ялҡаулыҡҡа бирелеү (һабышыу); **хва́тит лентя́йничать!** етте ялҡауланырға!

**ЛЕНЦА́: с ленцо́й** ялҡауланып ҡына, иренеп кенә; **де́лать с ленцо́й** *что-л.* иренеп кенә башҡарыу

**ЛЕ́НЧИК** *м* эйәр таҡтаһы, ҡаптал

**ЛЕНЬ** *ж* **1.** ялҡаулыҡ, иренсәклек, иренеү; **на неё иногда́ нахо́дит лень** уны ҡайһы ваҡыт ялҡаулыҡ баçа **2.** *кому в знач. сказ.*; *разг.* (*не хочется*) иренеү, (-һы/-һе) килмәй; **лень подня́ться с ме́ста** ултырған урындан торғо килмәй; **лень рабо́тать** эшләге килмәй ♦ **все, кому́ не лень** кем теләй, шул; теләһә кем

**ЛЕОПА́РД** *м* ҡаплан, леопард

**ЛЕОПА́РДОВЫЙ,** -ая, -ое ҡаплан …ы; **леопа́рдовая шку́ра** ҡаплан тиреһе

**ЛЕПЕСТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое таж япраҡлы

**ЛЕПЕСТО́К** *м* таж япрағы; **лепестки́ осыпа́ются** сәскә таждары ҡойола

**ЛЕ́ПЕТ** *м* **1.** (*неясная речь*) тәтелдәү, бытылдау; **ле́пет младе́нца** сабый бытылдауы **2.** (*неубедительная речь*) һөйләнеү, бытырлау, лыбырлау **3.** *перен.* (*невнятный, лёгкий шум*) сылтырау, селтер-селтер (шыбыр-шыбыр) килеү; **ле́пет ручья́** шишмә сылтырауы; **ле́пет ли́стьев** япраҡтарҙың шыбыр-шыбыр килеүе

**ЛЕПЕТА́НИЕ** *с см.* **лепета́ть**

**ЛЕПЕТА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.* **1.** (*говорить неясно — о детях*) тәтелдәү, бытылдау **2.** (*говорить невнятно, невразумительно*) һөйләнеү, бытырлау, лыбырлау **3.** *перен.* сылтырау, селтер-селтер килеү

**ЛЕПЁШКА** *ж* **1.** өшә, йәймә, көлсә, сөсө күмәс, ҡабартма; **испе́чь лепёшку** көлсә бешереү **2.** таблетка, төймә; **мя́тные лепёшки** бөтнөк таблеткалары ♦ **расшиби́ться (разби́ться) в лепёшку** *разг.* үлә яҙып тырышыу (эшләү), йән көскә тырышыу

**ЛЕПИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (әүәләп, һылап) яһау, эшләү, уҡмаштырыу; **лепи́ть горшо́к из гли́ны** балсыҡтан көршәк яһау **2.** (*делать гнездо, соты*) яһау, һылау, һылап яһау; **ла́сточка ле́пит гнездо́** ҡарлуғас оя яһай **3.** *что*; *разг.* (*приклеивать*) йәбештереү; **лепи́ть этике́тки** этикеткалар йәбештереү

**ЛЕПИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һылашыу, уҡмашыу, йәбешеү, йомарланыу; **снег хорошо́ ле́пится** ҡар яҡшы йомарлана **2.** (*располагаться, тесно примыкая к чему-л.*) терәп һалыныу, йәбешеп (һырышып) тороу; **дома́ лепи́лись к подно́жью горы́** йорттар тау итәгенә терәп һалынған

**ЛЕ́ПКА** *ж* **1.** *см.* **лепи́ть**; **занима́ться ле́пкой** әүәләп ниҙер яһау **2.** әүәләп яһалған нәмә

**ЛЕПНО́Й,** -ая, -ое **1.** һылап яһалған; **лепны́е украше́ния** һылап яһалған биҙәктәр **2.** ҡалҡыу биҙәкле; **лепно́й потоло́к** ҡалҡыу биҙәкле түшәм **3.** әүәләп яһау …ы; **лепны́е рабо́ты** әүәләп яһау эштәре

**ЛЕ́ПТА** *ж* **1.** (*монета*) лепта (*Борынғы Римда ваҡ тинлек аҡса*) **2.** *перен.* өлөш; **внести́ свою́ ле́пту** үҙ өлөшөңдө индереү

**ЛЕ́ПЩИК** *м* әүәләп яһаусы

**ЛЕС** *м* **1.** урман; **дрему́чий лес** ҡара урман; **хво́йный лес** ылыçлы урман **2.** (*строительный материал*) ағас(лыҡ), урман; **строево́й лес** төҙөлөш ағасы; **сплавля́ть лес** ағас ҡыуыу (ағыҙыу); **уча́сток ле́са** ағаслыҡ **3.** *перен.* (*большое количество*) бик күп, бихисап, иçәпһеҙ-һанһыҙ; **лес нефтяны́х вы́шек** бик күп нефть вышкалары ♦ **как в лесу́** бер нәмә лә айыра алмау; **кто в ле́с, кто по дрова́** береһе мәғрипкә, береһе мәшриҡҡә; нисек етте шулай

**ЛЕСА́ I** *только мн.* (*дощатые сооружения*) баçмалар (*төҙөлөш эшендә ҡулланылған ҡоролма*)

**ЛЕСА́ II** и **ЛЕ́СА** *ж* ҡармаҡ ебе

**ЛЕ́СЕНКА** *ж*; *уменьш. от* **ле́стница** бәләкәй баçҡыс

**ЛЕСИ́СТОСТЬ** *ж* урманлыҡ, ағаслыҡ

**ЛЕСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое урманлы, урман менән ҡапланған; **леси́стая ме́стность** урманлы урын, урманлыҡ

**ЛЕ́СКА** *ж см.* **леса́** II

**ЛЕСНИ́К** *м* урман ҡарауылсыһы, урман ҡараусы, урмансы; **рабо́тать лесннико́м** урман ҡарауылсыһы булып эшләү

**ЛЕСНИ́ЧЕСТВО** *с* урмансылыҡ, урман хужалығы

**ЛЕСНИ́ЧИЙ** *м* лесничий (**1.** *урман хужалығы мөдире* **2.** *урмандың именлеген һәм ағас эшләү эштәрен күҙәтеүсе*)

**ЛЕСНО́Й,** -ая, -ое **1.** урман …ы; **лесны́е я́годы** урманда (ҡырҙа) үçкән емеш-еләк **2.** урманлы; **лесно́й край** урманлы яҡ **3.** (*связанный с лесоводством*) урмансылыҡ …ы; **лесно́й институ́т** урмансылыҡ институты **4.** ағас …ы; **лесна́я би́ржа** ағас биржаһы

**ЛЕСО…** *урыç телендәге ҡушма һүҙҙәрҙә "ағас", "урман" мәғәнәһендә ҡулланыла, мәç.,* **лесопоса́дочный** ағас ултыртыу …ы

**ЛЕСОВЕ́ДЕНИЕ** *с* урмансылыҡ фәне

**ЛЕСОВО́Д** *м* урмансы, урмансылыҡ белгесе

**ЛЕСОВО́ДСТВО** *с* **1.** (*изучение лесного хозяйства*) урмансылыҡ, урмансылыҡ фәне **2.** (*уход за лесом*) урман эше, урмансылыҡ эше

**ЛЕСОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое урмансылыҡ ...ы; **лесово́дческий те́хникум** урмансылыҡ техникумы

**ЛЕСОВО́З** *м* лесовоз (*ағас ташыусы машина йәки судно*)

**ЛЕСОЗАГОТОВИ́ТЕЛЬ** *м* ағас әҙерләүсе

**ЛЕСОЗАГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ағас әҙерләү ...ы; **лесозаготови́тельный пункт** ағас әҙерләү пункты

**ЛЕСОЗАВО́Д** *м* ағас эшкәртеү заводы

**ЛЕСОЗАГОТО́ВКИ** *мн.* (*ед.* **лесозагото́вка** *ж*) ағас әҙерләү (*хужалыҡ тармағы*)

**ЛЕСОЗАЩИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*предназначенный для защиты леса*) урман һаҡлау ...ы; **лесозащи́тная ста́нция** урман һаҡлау станцияһы **2.** баҫыу (тимер юл, һуғарыу каналдарын) ышыҡлау (һаҡлау) ...ы; **лесозащи́тная полоса́** баҫыу һаҡлау һыҙаттары

**ЛЕСОКОМБИНА́Т** *м* ағас эшкәртеү комбинаты

**ЛЕСОМАТЕРИА́ЛЫ** *мн.* (*ед.* **лесоматериа́л** *м*) ағас-таҡта (материалдар)

**ЛЕСОМЕЛИОРА́ЦИЯ** *ж* урман үҫтереү, урман тәрбиәләү эше (*тәбиғәт шарттарын яҡшыртыу эштәре*)

**ЛЕСОНАСАЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** (*посадка леса*) ағас ултыртыу **2.** *обычно мн.* **лесонасажде́ния** ултыртып үҫтерелгән урман, ултыртылған ағастар; **полезащи́тные лесонасажде́ния** баҫыу һаҡлау өсөн ултыртылған ағастар

**ЛЕСООБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее ағас эшкәртеү ...ы; **лесообраба́тывающий заво́д** ағас эшкәртеү заводы

**ЛЕСООХРА́НА** *ж* урман ҡарауылы

**ЛЕСОПА́РК** *м* урманлы парк, урман-парк

**ЛЕСОПА́РКОВЫЙ,** -ая, -ое урманлы парк ...ы, урман-парк ...ы; **лесопа́рковый райо́н** урман-парк районы

**ЛЕСОПЕРЕВА́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое ағас тейәү ...ы, ағас бушатыу ...ы; **лесопереева́лочная ба́за** ағас тейәү базаһы

**ЛЕСОПИ́ЛКА** *ж* **1.** *разг.* таҡта ярыу заводы **2.** таҡта ярыу (ағас бысыу) машинаһы

**ЛЕСОПИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое таҡта ярыу ...ы, ағас бысыу ...ы; **лесопи́льный заво́д** таҡта ярыу заводы

**ЛЕСОПИ́ЛЬНЯ** *ж*; *разг.* таҡта ярыу заводы (*ҙур булмаған*)

**ЛЕСОПИТО́МНИК** *м* урман питомнигы

**ЛЕСОПОГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое ағас тейәгес; **лесопогру́зочные маши́ны** ағас тейәгес машиналар

**ЛЕСОПОЛОСА́** *ж* урман һыҙаты

**ЛЕСОПОСА́ДКА** *ж* **1.** ағас ултыртыу; **закóнчить лесопоса́дку** ағас ултыртыуҙы тамамлау **2.** *обычно мн.* **лесопоса́дки** ултыртылған ағастар; **све́жие лесопоса́дки** яңы ултыртылған ағастар

**ЛЕСОПОСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое ағас ултыртыу ...ы; **лесопоса́дочные маши́ны** ағас ултыртыу машиналары

**ЛЕСОПРОМЫ́ШЛЕННИК** *м* урман сәнәғәтсеһе

**ЛЕСОПРОМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* урман сәнәғәте

**ЛЕСОПРОМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое урман сәнәғәте ...ы; **лесопромы́шленный ко́мплекс** урман сәнәғәте комплексы

**ЛЕСОПУ́НКТ** *м* ағас-таҡта әҙерләү пункты

**ЛЕСОРАЗВЕДЕ́НИЕ** *с* ағас үрсетеү

**ЛЕСОРАЗРАБО́ТКИ** *мн.* (*ед.* **лесоразрабо́тка** *ж*) ағас әҙерләү эштәре

**ЛЕСОРУ́Б** *м* урман ҡырҡыусы; **рабо́тать лесору́бом** урман ҡырҡыусы булып эшләү

**ЛЕСОРУ́БНЫЙ** и **ЛЕСОРУ́БОЧНЫЙ,** -ая, -ое урман (ағас) ҡырҡыу ...ы; **лесору́бный инструме́нт** ағас ҡырҡыу ҡоралдары

**ЛЕСОСЕ́КА** *ж* ҡырҡын, ҡырҡынды (*ҡырҡыу өсөн билдәләнгән диләнкә*)

**ЛЕСОСПЛА́В** *м* ҡыуғын, һал (ағас) ағыҙыу

**ЛЕСОСПЛА́ВНЫЙ,** -ая, -ое һал ағыҙыу ...ы; **лесоспла́вная конто́ра** һал ағыҙыу контораһы

**ЛЕСОСТЕПНО́Й,** -ая, -ое *геогр.* урман-дала ...ы; **лесостепно́й райо́н** урман-дала районы

**ЛЕСОСТЕ́ПЬ** *ж*; *геогр.* урман-дала, урманлы дала

**ЛЕСОТА́СКА** *ж*; *тех.* ағас сығарыусы машина (*ағастарҙы һыуҙан сығара, күтәрә торған*)

**ЛЕСОТЕХНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое урман-техника ...ы; **лесотехни́ческий институ́т** урман-техника институты

**ЛЕСОТУ́НДРА** *ж*; *геогр.* урман-тундра, урманлы тундра

**ЛЕСОТУ́НДРОВЫЙ,** -ая, -ое *геогр.* урманлы тундра ...ы

**ЛЕСОУСТРО́ЙСТВО** *с*; *спец.* урман тәрбиәләү эштәре

**ЛЕСПРОМХО́З** *м* леспромхоз, ағас эшкәртеү хужалығы

**ЛЁСС** *м*; *геол.* һары тупраҡ

**ЛЕ́СТНИЦА** *ж* **1.** баҫҡыс; **винтова́я ле́стница** бормалы баҫҡыс; **поднима́ться по ле́стнице** баҫҡыс буйлап менеү **2.** *в знач. нареч.* **ле́стницей** баҫҡыс-баҫҡыс (киртләс-киртләс) булып

**ЛЕ́СТНИЧНЫЙ,** -ая, -ое баҫҡыс ...ы; **ле́стничная ступе́нька** баҫҡыс баҫмаһы ♦ **ле́стничная кле́тка** *см.* **кле́тка**

**ЛЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*содержащий похвалу*) маҡтаулы, маҡтап (осондороп) ебәреүсе; **ле́стная оце́нка** маҡтаулы баһалама **2.** (*вызывающий горделивое чувство*) ғорурланырлыҡ; **ле́стное предложе́ние** ғорурланырлыҡ тәҡдим

**ЛЕСТЬ** *ж* ярарға тырышып (ялағайланып, ярамһаҡланып, юхаланып) маҡтау; **ни́зкая лесть** түбәнлеккә төшөп ярамһаҡланыу; **говори́ть без ле́сти** юхаланмай ғына һөйләү

**ЛЕСХО́З** *м* (*лесное хозяйство*) урман хужалығы

**ЛЕСХО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое урман хужалығы ...ы

**ЛЁТ** *м см.* **лете́ть**; **пять часо́в лёта** биш сәғәтлек юл (*самолётта*); **на лету́** осоп барғанда, осҡанда ♦ **хвата́ть на лету́** шунда уҡ эләктереп алыу, бер һүҙҙән үк аңлап алыу; **лови́ть с лёту** бик тиҙ аңлау (төшөнөп алыу)

**ЛЕ́ТА** *ж*; *миф.* Лета (*грек мифологияһында ер аҫты йылғаһы исеме*) ♦ **ка́нуть в Ле́ту** эҙһеҙ юғалыу

**ЛЕТА́** *только мн.* **1.** (*годы*) йыл, йылдар; **не́сколько лет тому́ наза́д** бынан бер нисә йыл элек **2.** (*возраст*) йәш; **ско́лько вам лет?** һеҙгә нисә йәш?; **с са́мых ра́нних лет** кесе йәштән ♦ **в лета́х** оло йәштә; **на скло́не (ста́рости) лет** ҡартайғас, ҡарт көнөндә; **во цве́те лет** ир уртаһы; **сре́дних лет** урта йәштәрҙәге

**ЛЕТА́ЛЬНЫЙ: лета́льный исхо́д** үлем

**ЛЕТАРГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мед.* летаргик ♦ **летарги́ческий сон** летаргик йоҡо, мәрткә китеү

**ЛЕТАРГИ́Я** *ж*; *мед.* летаргия, мәрт, мәрткә китеү

**ЛЕТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое осоу ...ы; **лета́тельный аппара́т** осоу аппараты

**ЛЕТА́ТЬ** *несов.* **1.** осоу; **высоко́ лета́ть** бейек осоу **2.** *перен.* (*двигаться легко и быстро*) елеү, осоу, сабыу **3.** *разг.* (*падать*) осоп төшөү, ҡолау

**ЛЕТЕ́ТЬ** *несов.* **1.** осоу, осоп барыу; **пти́ца лети́т** ҡош оса **2.** *перен.* (*мчаться*) елеү, осоу, сабыу; **конь лети́т** ат елә **3.** *перен.* (*о времени*) үтеү, тиҙ үтеү (уҙыу); **вре́мя лети́т** ваҡыт бик тиҙ үтә **4.** *разг.* (*падать*) осоп (ҡолап) төшөү; **лете́ть со сту́ла** ултырғыстан осоп төшөү **5.** *перен.* яуыу; **летя́т телегра́ммы** телеграммалар яуа

**ЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее йәйге; **ле́тняя пора́** йәйге осор; **ле́тнее пла́тье** йәйге күлдәк

**...ЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "йыллыҡ", "йыллы" мәғәнәләрен аңлатҡан икенсе өлөшө, мәҫ.*, **многоле́тний** күп йыллыҡ

**ЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** осоу ...ы; **лётное по́ле** осоу майҙаны **2.** аяҙ, осорға мөмкин булған, осарлыҡ; **лётная пого́да** аяҙ (осарлыҡ) көн **3.** осоусылар ...ы; **лётная шко́ла** осоусылар мәктәбе

**ЛЕ́ТО** *с* йәй; **жа́ркое ле́то** эҫе йәй; **наступи́ло ле́то** йәй етте; **в тече́ние всего́ ле́та** йәйҙең-йәй буйы ♦ **ба́бье ле́то** эбейҙәр сыуағы; **ско́лько лет, ско́лько зим!** *см.* **ско́лько**

**ЛЕТО́ВКА** *ж* йәйләү

**ЛЕТОИСЧИСЛЕ́НИЕ** *с* йыл иҫәбе; **оди́ннадцатый год восто́чного (двенадцатиле́тнего) ци́кла летоисчисле́ния** ун ике йыллыҡ мөсәлдең ун беренсе йылы

**ЛЕТО́К** *м* кейә (*умарта ауыҙы*)

**ЛЕ́ТОМ** *нареч.* йәй көнө, йәй көнөндә, йәйен, йәйгелектә, йәйгеһен

**ЛЕТОПИСА́НИЕ** *с* йылъяҙмалар яҙыу

**ЛЕТОПИ́СЕЦ** *м*; *ист.* йылъяҙмасы (*ваҡиғаларҙы йыллап яҙа барыусы*)

**ЛЕТОПИ́СНЫЙ,** -ая, -ое йылъяҙма ...ы; **летопи́сный расска́з** йылъяҙма хикәйәһе

**ЛЕ́ТОПИСЬ** *ж* йылъяҙма; **ле́топись собы́тий** ваҡиғалар йылъяҙмаһы

**ЛЕТОСЧИСЛЕ́НИЕ** *с см.* **летоисчисле́ние**

**ЛЕТУ́Н** *м*; *разг.* **1.** (*о птице*) яҡшы осоусы; (*о коне*) сапҡыр **2.** *перен.*, *неодобр.* (*о том, кто часто меняет место работы*) осҡалаҡ, алағанат

**ЛЕТУ́НЬЯ** *ж*; *разг. см.* **лету́н** 1

**ЛЕТУ́ЧЕСТЬ** *ж*; *хим.* тиҙ осоп бөтөүсәнлек

**ЛЕТУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** (*летящий*) елбәҙәк, осҡалаҡ, осҡаҡ, оса торған; **лету́чий снег** елбәҙәк ҡар **2.** *хим.* (*легко испаряющийся*) тиҙ осоусан; **лету́чие масла́** тиҙ осоусан майҙар **3.** *перен.* (*проводимый быстро*) ашығыс, ҡыҫҡа; **лету́чее собра́ние** ашығыс йыйылыш **4.** *перен.* (*кратковременный, неуловимый*) тиҙ үтә торған; **лету́чий ревмати́зм** *мед.* тиҙ үтеүсән ревматизм; **лету́чий отря́д** сапҡын отряд ♦ **лету́чая мышь** *зоол.* ярғанат; **лету́чая ры́ба** *зоол.* осар балыҡ

**ЛЕТУ́ЧКА** *ж*; *разг.* **1.** (*собрание*) ҡыҫҡа ғына йыйылыш **2.** осоҡ (ас) орлоҡ **3.** (*передвижная ремонтная бригада*) летучка **4.** летучка (*мөһим ваҡиға тураһында ашығыс сығарылған яҙыу, кескәй прокламация*)

**ЛЁТЧИК** *м* и **ЛЁТЧИЦА** *ж* лётчик, осоусы; **быть лётчиком** лётчик булыу; **лётчик-испыта́тель** лётчик-һынаусы

**ЛЕТЯ́ГА** *ж* осар тейен

**ЛЕ́ЧАЩИЙ,** -ая, -ее дауалаусы; **ле́чащий врач** дауалаусы табип

**ЛЕЧЕ́БНИЦА** *ж* дауахана, дауалау йорто

**ЛЕЧЕ́БНЫЙ,** -ая, -ое дауалау ...ы, им; **лече́бные сре́дства** дауалау саралары

**ЛЕЧЕ́НИЕ** *с см.* **лечи́ть, лечи́ться**; **амбулато́рное лече́ние** амбулатор дауаланыу; **пройти́ курс лече́ния** дауалау курсын үтеү

**ЛЕЧИ́ТЬ** *несов. кого-что* дауалау, һауыҡтырыу, имләү; **лечи́ть от гри́ппа** гриптан дауалау; **лечи́ть больно́го** ауырыуҙы дауалау

**ЛЕЧИ́ТЬСЯ** *несов.* дауаланыу; **лечи́ться от просту́ды** һыуыҡ тейеүҙән дауаланыу

**ЛЕЧЬ** *сов.* **1.** ятыу, йоҡларға ятыу; **лечь на дива́н** диванға ятыу; **2.** *1 и 2 л. не употр.* (*покрыть собой*) ятыу, төшөү, түшәлеү; **снег лёг на поля́** яланға ҡар ятҡан **3.** *на кого-что*; *перен.* (*обременять, отягощать*) төшөү; **отве́тственность ля́жет на вас** яуаплылыҡ һеҙҙең өҫкә төшәр **4.** *мор.*, *ав.* ыңғайлау, (юлға) төшөү

♦ **лечь в осно́ву** нигеҙ булып ятыу; **лечь на пле́чи** *кого, чьи, кому* өҫкә төшөү; **лечь костьми́** башты һалыу, һәләк булыу; **лечь ка́мнем на́ душу (сердце)** йөрәккә (күңелгә) таш булып ятыу

**ЛЕ́ШИЙ** *м* шүрәле

**ЛЕЩ** *м* ҡорман, таран (*балыҡ*); **пойма́ть леща́** ҡорман балыҡ тотоу

**ЛЕЩИ́НА** *ж* (*орешник*) сәтләүек ҡыуағы

**ЛЖЕНАУ́КА** *ж* ялған фән

**ЛЖЕПРОРО́К** *м* ялған пәйғәмбәр

**ЛЖЕСВИДЕ́ТЕЛЬ** *м*; *юр.* ялған шаһит

**ЛЖЕСВИДЕ́ТЕЛЬСТВО** *с*; *юр.* ялған шаһитлыҡ

**ЛЖЕСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *несов.*; *юр.* ялған шаһитлыҡ итеү

**ЛЖЕУЧЕ́НИЕ** *с* ялған тәғлимәт

**ЛЖЕЦ** *м* ялғансы, алдаҡсы, алдар

**ЛЖИ́ВОСТЬ** *ж* ялғанлыҡ

**ЛЖИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялғансы, алдаҡсы; **лжи́вый челове́к** алдаҡсы кеше **2.** ялған, дөрөҫ булмаған; **лжи́вый аргуме́нт** ялған дәлил **3.** яһалма; **лжи́вая улы́бка** яһалма йылмайыу

**ЛИ I** и **ЛЬ** *частица* и *союз* **1.** *частица* (*для усиления вопр. характера предложения*) -мы/-ме; **прочита́ла ли ты кни́гу?** һин китапты уҡып сыҡтыңмы?

**2.** *частица* (*с наречиями, существительными и т.п. — при выражении сомнения*) -мы/-ме икән; **не зна́ю, приду́ ли я** белмәйем, килерменме икән; **ма́ло ли** аҙмы ни

**3.** *союз разд.* (*при сопоставлении предложений или членов предложения, по значению исключающих или заменяющих друг друга*) -мылыр/-мелер; **бы́л ли он там, не́ был ли — не зна́ю** ул унда булғанмылыр, юҡмылыр — белмәйем

**4.** *союз разд.-перечисл.* -мы/-ме; **сего́дня ли, за́втра ли** бөгөнмө, иртәгәме

**ЛИ II** *с нескл.* ли (**1.** *Ҡытайҙа оҙонлоҡ үлсәү берәмеге* **2.** *Ҡытайҙа, Монголияла, Вьетнамда алтын, көмөш үлсәү берәмеге*)

**ЛИА́НА** *ж* лиана (*эҫе яҡтарҙағы үрмәле үҫемлектәрҙең дөйөм исеме*)

**ЛИБЕРА́Л** *м* либерал (**1.** *либерализм яҡлы кеше* **2.** *сәйәс. либераль фирҡә ағзаһы*)

**ЛИБЕРАЛИ́ЗМ** *м* либерализм (**1.** *сәйәси йүнәлеш* **2.** *һөйл. килешеүсәнлек, принципһыҙлыҡ*); **прояви́ть либерали́зм** принципһыҙлыҡ күрһәтеү ♦ **гнило́й либерали́зм** һөрһөгән либерализм

**ЛИБЕРА́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.* **1.** *полит.* либераллек итеү, либераллек күрһәтеү **2.** *разг.* (*попустительствовать*) юл ҡуйыу

**ЛИБЕРА́ЛЬНО-БУРЖУА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое либераль-буржуаз ...ы; **либера́льно-буржуа́зная па́ртия** либераль-буржуаз фирҡә

**ЛИБЕРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *полит.* либераль, либераллек ...ы; **либера́льная па́ртия** либераль фирҡә (партия) **2.** либераль; **либера́льные взгля́ды** либераль ҡараштар

**ЛИ́БО I** *союз разд.* йәки, йә; **приходи́ ли́бо сего́дня, либо за́втра** йә бөгөн, йә иртәгә кил ♦ **либо пан, либо пропа́л** йә уңа, йә туңа

**-ЛИБО II** *частица* булһа, булһа ла; **кто́-либо** кем булһа ла; **что́-либо** нимә булһа ла; **куда́-либо** ҡайҙа булһа ла; **отку́да-либо** ҡайҙан булһа ла

**ЛИБРЕТТИ́СТ** *м* либретто яҙыусы

**ЛИБРЕ́ТТО** *с нескл.* либретто (**1.** *ҙур музыкаль әҫәрҙең* (*опера һәм балеттың*) *яҙма тексы* **2.** *кинофильмдың сюжет планы, схемаһы*)

**ЛИ́ВЕНЬ** *м* **1.** ҡойма яуын, ҡойоп яуған ямғыр; **прошёл ли́вень** ҡойма яуын булып үтте **2.** *перен.* ҡойон; **ли́вень пуль** пулялар ҡойоно

**ЛИ́ВЕР** *м* үпкә-бауыр; **пиро́г с ли́вером** үпкә-бауыр бәлеше

**ЛИ́ВЕРНЫЙ,** -ая, -ое үпкә-бауыр ...ы; **ли́верная колбаса́** үпкә-бауыр колбасаһы

**ЛИВМЯ́** *нареч.*; *разг.* күнәкләп, ҡойоп; **дождь ливмя́ льёт** ямғыр ҡойоп яуа

**ЛИ́ВНЕВЫЙ,** -ая, -ое ҡойма ямғыр; **ли́вневые дожди́** ҡойма ямғырҙар

**ЛИВРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ливреялы; **ливре́йный лаке́й** ливреялы лакей

**ЛИВРЕ́Я** *ж* ливрея, уҡалы кейем (*швейцарҙар, лакейҙар һәм күсерҙәр өсөн*)

**ЛИ́ГА I** *ж* лига (*ойошма, союз*); **Ли́га На́ций** *ист.* Милләттәр Лигаһы; **вы́сшая ли́га** *спорт.* юғары лига

**ЛИ́ГА II** *ж*; *муз.* лига (*ноталарҙы ҡушып уйнарға тейешлекте күрһәтеүсе билдә*)

**ЛИГАТУ́РА** *ж* лигатура (**1.** *хим. ныҡ ҡатылыҡ биреү өсөн алтынға йәки көмөшкә ҡушыла торған баҡыр йәки аҡ ҡурғаш* **2.** *мед. операция ваҡытында ҡан тамырҙарын бәйләй торған ебәк еп* **3.** *нәшр. бер-береһенә бәйле булған, бергә ҡойолған ике йәки өс хәреф*)

**ЛИГРОИ́Н** *м*; *хим.* лигроин (*нефттән алынған матдә*)

**ЛИ́ДЕР** *м* лидер (**1.** *сәйәс. берәй фирҡәнең йәки профсоюз ойошмаһының юлбашсыһы* **2.** *спорт. ярышта беренселекте алып килеүсе* **3.** *диңг. эскадрала алдан йөрөүсе миноносец*)

**ЛИ́ДЕРСТВО** *м* лидерлыҡ; **борьба́ за ли́дерство** лидерлыҡ өсөн көрәш

**ЛИДИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* беренсе (лидер), лидерлыҡ итеү; **лиди́ровать в ша́хматном турни́ре** шахмат турнирында беренсе булыу

**ЛИДИ́РУЮЩИЙ,** -ая, -ее албирмәҫ; **лиди́рующий спортсме́н** албирмәҫ спортсы

**ЛИЗА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* ялау; **котёнок ли́жет ла́пу** бесәй балаһы тәпәйен ялай **2.** *перен.* ялау, ялмау; **языки́ огня́ лиза́ли сте́ны до́ма** ялҡын өйҙөң стенаһын ялмай ине ♦ **лиза́ть пя́тки** *кому, у кого* табанын ялау, тәрилкә тотоу

**ЛИЗА́ТЬСЯ** *несов.* яланыу

**ЛИЗНУ́ТЬ** *сов. кого-что* ялаштырыу, ялап алыу

**ЛИЗОБЛЮ́Д** *м*; *разг.*, *презр.* ялаҡай, тәрилкә тотоусы

**ЛИЗОБЛЮ́ДСТВО** *с*; *разг.*, *презр.* ялаҡайлыҡ

**ЛИЗО́Л** *м*; *спец.* лизол (*дезинфекция өсөн ҡулланыла торған шыйыҡса*)

**ЛИК I** *м*; *уст.*, *трад.-поэт.* **1.** йөҙ, ҡиәфәт, сырай **2.** *перен.* төҫ; **лу́нный лик** ай төҫө

**ЛИК II** *м*; *рел.* изгеләр (йөҙө); **причи́слить к ли́ку святы́х** изгеләр араһына индереү

**ЛИКБЕ́З** *м*; *ист.* (*ликвидация безграмотности*) ликбез (*грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү*)

**ЛИКВИДА́ТОР** *м*; *полит.* ликвидатор, ликвидаторлыҡ тарафтары

**ЛИКВИДА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое *полит.* ликвидаторлыҡ ...ы; **ликвида́торские элеме́нты** ликвидаторлыҡ элементтары

**ЛИКВИДА́ТОРСТВО** *с*; *полит.* ликвидаторлыҡ (*1908—1912 йй. пролетариаттың революцион фирҡәһен бөтөрөргә ынтылған меньшевистик ағым*)

**ЛИКВИДАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ликвидация ...ы; **ликвидацио́нная коми́ссия** ликвидация комиссияһы

**ЛИКВИДА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*прекращение деятельности*) туҡтатыу, ябыу, ликвидация **2.** (*уничтожение*) бөтөрөү, юҡҡа сығарыу; **ликвида́ция негра́мотности** грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү

**ЛИКВИДИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** бөтөрөү, юҡҡа сығарыу; **ликвиди́ровать отде́л** бүлекте бөтөрөү **2.** юҡ итеү; **ликвиди́ровать врага́** дошманды юҡ итеү

**ЛИКВИДИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* бөтөү, юҡҡа сығыу **2.** *несов.* ябылыу, туҡталыу; **фи́рма ликвиди́ровалась** фирма ябылды

**ЛИКВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *эк.* ликвид, аҡсаға әйләндереп була торған

**ЛИКЁР** *м* ликёр (*шәкәре күп булған шарап төрө*)

**ЛИКЁРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ликёр ...ы; **ликёрный заво́д** ликёр заводы **2.** ликёрлы, эсендә ликёры булған; **ликёрные конфе́ты** ликёрлы кәнфит

**ЛИКОВА́НИЕ** *с см.* **ликова́ть**

**ЛИКОВА́ТЬ** *несов.* ныҡ ҡыуаныу, шатланыу

**ЛИЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *трад.-поэт.* ләлә кеүек, ап-аҡ **2.** *в знач. сущ.* **лиле́йные** *мн.*; *бот.* ләлә һымаҡтар (*ләлә, һарына, томбойоҡ һ.б.*)

**ЛИЛИПУ́Т** *м* и **ЛИЛИПУ́ТКА** *ж* лилипут, иргәйел, кәрлә

**ЛИ́ЛИЯ** *ж* ләлә; **жёлтая ли́лия** һары ләлә; **пёстрая ли́лия** сыбар ләлә; **водяна́я ли́лия** томбойоҡ

**ЛИЛОВЕ́ТЬ** *несов.* алһыу-зәңгәргә әйләнеү, алһыу-зәңгәр төҫкә инеү

**ЛИЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое алһыу зәңгәр; **лило́вый плато́к** алһыу зәңгәр яулыҡ

**ЛИМА́Н** *м*; *геогр.* лиман (*йылғаның диңгеҙгә ҡойған урынындағы ҡултыҡ*)

**ЛИМА́ННЫЙ,** -ая, -ое *геогр.* лиман ...ы; **лима́нный бе́рег** лиман яры

**ЛИМИ́Т** *м* лимит (**1.** *сикле норма* **2.** *мат. сикләнгән сумма, һан*); **превы́сить лими́т** (сикле) норманан арттырыу (сығыу)

**ЛИМИТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **лимити́ровать**

**ЛИМИТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* лимитлау, сикләү; **лимити́ровать вы́воз това́ров** тауарҙарҙың ситкә сығарылыуын сикләү

**ЛИМИТИ́РОВАТЬСЯ** *несов.* лимитланыу, сикләнеү

**ЛИМНО́ЛОГ** *м*; *спец.* лимнология белгесе, лимнолог

**ЛИМНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *спец.* лимнологик; **лимнологи́ческие иссле́дования** лимнологик тикшеренеүҙәр

**ЛИМНОЛО́ГИЯ** *ж*; *спец.* лимнология (*күлдәрҙе өйрәнә торған фән тармағы*)

**ЛИМО́Н** *м* лимон (*ағасы һәм емеше*) ♦ **как вы́жатый лимо́н** шиңгән гөлдәй (*хәлдән тайған, арыған кеше тураһында*)

**ЛИМОНА́Д** *м* лимонад; **пить лимона́д** лимонад эсеү

**ЛИМО́НКА** *ж*; *прост.* лимонка (*шартлағанда ныҡ ярсыла торған тумалаҡ граната*)

**ЛИМО́ННИК** *м* лимонник ҡыуағы (*емештәре шифалы Алыҫ Көнсығыш үҫемлеге*)

**ЛИМО́ННИЦА** *ж* һары күбәләк

**ЛИМО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** лимон ...ы; **лимо́нная ко́рка** лимон ҡабығы **2.** (*о цвете*) асыҡ һары төҫлө

**ЛИМУЗИ́Н** *м* лимузин (*автомобиль төрө*)

**ЛИ́МФА** *ж*; *физиол.* һары һыу, лимфа

**ЛИМФАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *физиол.* лимфа ...ы; **лимфати́ческая железа́** лимфа биҙе

**ЛИНГВИ́СТ** *м* тел белгесе, тел ғалимы, лингвист

**ЛИНГВИ́СТИКА** *ж* тел ғилеме (белеме)

**ЛИНГВИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое лингвистик; **лингвисти́ческие иссле́дования** лингвистик тикшеренеүҙәр

**ЛИНЕ́ЙКА** *ж* **1.** һыҙғыс, линейка; **деревя́нная лине́йка** ағас һыҙғыс **2.** һыҙыҡ, буй; **писа́ть по лине́йкам** һыҙыҡтар өҫтөнән яҙыу; **тетра́дь в лине́йку** буй дәфтәр **3.** *спец.* линейка (*строй в одну линию*); **лине́йка ученико́в** уҡыусылар линейкаһы

**ЛИНЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*имеющий вид линии*) һыҙыҡлы; **лине́йный рису́нок** һыҙыҡлы һүрәт **2.** (*состоящий из линий*) һыҙыҡ; **лине́йный орна́мент** һыҙыҡ биҙәк **3.** *ист.* (*пограничный*) сик ...ы; **лине́йная слу́жба** сик хеҙмәте **4.** *мат.* һыҙма ...ы, һыҙыҡ ...ы; **лине́йные ме́ры** һыҙыҡ үлсәмдәре; **лине́йная геоме́трия** һыҙма геометрия ♦ **лине́йная ско́рость** *физ.* линия тиҙлеге

**ЛИНЕ́ЙЧАТЫЙ,** -ая, -ое һыҙыҡлы-һыҙыҡлы, йыйырсыҡлы; **лине́йчатые спе́ктры** *физ.* һы-

ҙыҡлы-һыҙыҡлы спектрҙар; **лине́йчатый лист** *бот.* ҡыяҡ япраҡ

**ЛИНЁК** *м*; *уменьш.-ласк. от* **линь** I

**ЛИ́НЗА** *ж*; *физ.* **1.** линза (*ике яғы ла көмрө тыңҡәрәк оптик быяла*) **2.** *анат.* күҙ яҫмығы

**ЛИ́НИЯ** *ж* **1.** һыҙыҡ; **провести́ ли́нию** һыҙыҡ үткәреү **2.** һыҙат, һыҙыҡ; **ли́ния горизо́нта** офоҡ һыҙығы **3.** (*путь сообщения*) юл; **трамва́йная ли́ния** трамвай юлы **4.** (*длинный ряд или цепь чего-л.*) һыҙат; **ли́ния укрепле́ний** нығытмалар һыҙаты **5.** яҡ; **родство́ по ли́нии отца́** атай яғынан туғанлыҡ **6.** *перен.* (*направление, образ действий*) йүнәлеш; **по ли́нии** *чего* йүнәлештән ♦ **ли́ния оборо́ны** *воен.* оборона һыҙығы

**ЛИНКО́Р** *м* (*линейный корабль*) линия карабы (*яҡшы ҡоралланған ҙур һуғыш карабы*)

**ЛИНО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое һыҙыҡлы; **лино́ванная бума́га** һыҙыҡлы ҡағыҙ

**ЛИНОВА́ТЬ** *несов.* *что* һыҙыу, һыҙыҡ үткәрәү

**ЛИНО́ЛЕУМ** *м* линолеум (*һыу үткәрмәй торған ҡалын туҡыма*); **цветно́й лино́леум** төҫлө линолеум

**ЛИНОТИ́П** *м*; *полигр.* линотип (*хәреф йыйыусы машина*)

**ЛИНОТИПИ́СТ** *м*; *полигр.* линотипсы, линотипта эшләүсе

**ЛИНОТИ́ПНЫЙ,** -ая, -ое *полигр.* линотип ...ы; **линоти́пный набо́р** линотип ысулы менән йыйыу, линотипта йыйыу

**ЛИНЧЕВА́НИЕ** *с см.* **линчева́ть**

**ЛИНЧЕВА́ТЬ** *сов., несов. кого* судһыҙ язалап үлтереү (*Линч хөкөмө буйынса*)

**ЛИНЬ I** *м* ҡарабалыҡ

**ЛИНЬ II** *м*; *мор.* бау, нескә арҡан

**ЛИ́НЬКА** *ж* төләү; **пери́од ли́ньки** төләү ваҡыты

**ЛИНЮ́ЧИЙ,** -ая, -ее *разг.* **1.** уңыусан, уңа торған; **линю́чая кра́ска** уңа торған буяу **2.** (*о животных*) төләй торған, ҡауын һала торған

**ЛИНЯ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* төҫө уңған, уңып (ағарып) бөткән

**ЛИНЯ́ТЬ** *несов.* **1.** уңыу, төҫ китеү, төҫөн юғалтыу; **мате́рия линя́ет** туҡыма уңа **2.** (*о животных*) йөнөн ҡойоу; (*о птицах*) төләү; (*о змеях*) ҡау һалыу; **за́яц линя́ет весно́й** ҡуян яҙын йөнөн ҡоя; **ле́том косачи́ линя́ют** ата ҡорҙар йәй төләй

**ЛИ́ПА I** *ж* йүкә, йүкә ағасы

**ЛИ́ПА II** *ж*; *прост.* (*фальшивка*) ялған (*ялған ҡағыҙ, һүҙ һ.б. ҡарата*)

**ЛИ́ПКИЙ,** -ая, -ое һылашҡаҡ, йәбешкәк, һабышҡаҡ; **ли́пкий снег** һылашҡаҡ ҡар; **ли́пкая гли́на** һылашҡаҡ балсыҡ; **ли́пкая бума́га** йәбешкәк ҡағыҙ

**ЛИ́ПНУТЬ** *несов.* **1.** *к кому-чему* йәбешеү, һылашыу; **гли́на ли́пнет к лопа́те** балсыҡ көрәккә йәбешә **2.** *разг.* һырыу; **му́хи ли́пнут к мёду** себен балға һырый **3.** *перен., разг.* (*приставать*) тотоноп (кереп, бәйләнеп) барыу, һағыҙаҡланыу

**ЛИПНЯ́К** *м* (*липовая роща*) йүкәлек

**ЛИ́ПОВЫЙ I,** -ая, -ое йүкә ...ы; **ли́повый мёд** йүкә балы; **ли́повый цвет** йүкә сәскәһе

**ЛИ́ПОВЫЙ II,** -ая, -ое *прост.* алдыҡ, ялған; **ли́повый докуме́нт** алдыҡ документ

**ЛИПУ́ЧИЙ,** -ая, -ее *прост. см.* **ли́пкий**

**ЛИПУ́ЧКА** *ж* **1.** *бот.* һырлан **2.** *разг.* йәбешкәк ҡағыҙ (*пластырь һ.б.*)

**ЛИ́РА I** *ж* **1.** *муз.* лира, саз (*музыка ҡоралы*) **2.** *перен.* ижади илһам символы

**ЛИ́РА II** *ж* лира (*Италия һәм Төркиә аҡса берәмеге*)

**ЛИРИ́ЗМ** *м* **1.** *лит.* лиризм (*лирик тойғоға бай булыу*); **лири́зм пе́сни** йырҙың лиризмы **2.** (*лирическое настроение*) нескә тойғо; **впасть в лири́зм** нескә тойғоларға бирелеү

**ЛИ́РИК** *м* лирик, лирик шағир

**ЛИ́РИКА** *ж* **1.** (*род художественной литературы*) лирика **2.** лирика; **ли́рика Салава́та Юла́ева** Салауат Юлаев лирикаһы **3.** *перен.* (*эмоциональность*) нескә тойғоло (*хис*)

**ЛИ́РИКО-ДРАМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *лит.* лирик-драматик; **ли́рико-драмати́ческая поэ́ма** лирик-драматик поэма **2.** *муз.* лирик-драматик (*йырсының тауышы тураһында*)

**ЛИРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* лирик, күтәренке; **лири́ческие стихи́** лирик шиғырҙар; **лири́ческое настрое́ние** лирик (күтәренке) кәйеф; **лири́ческий те́нор** *муз.* лирик тенор ♦ **лири́ческое отступле́ние** лирик сигенеү; **лири́ческий геро́й** лирик герой

**ЛИРИ́ЧНОСТЬ** *ж* нәфислек, хискә бирелеүсәнлек

**ЛИРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое лирик, күтәренке, хисле; **лири́чный тон** лирик тон

**ЛИС** *м* ата төлкө

**ЛИСА́** *ж*; *в разн. знач.* төлкө; **ры́жая лиса́** ерән төлкө; **чёрно-бу́рая лиса́** ҡара төлкө; **охо́титься на лису́** төлкөгә һунар итеү; **оказа́ться лисо́й** хәйләкәр булып сығыу, төлкө кеүек булыу

**ЛИСЁНОК** *м* төлкө балаһы

**ЛИ́СИЙ,** -ья, -ье **1.** төлкө ...ы; **ли́сья шку́ра** төлкө тireһe; **ли́сий след** төлкө эҙе **2.** төлкө; **ли́сья ша́пка** төлкө бүрек

**ЛИСИ́ЦА** *ж* төлкө; **кра́сная лиси́ца** ҡыҙыл төлкө; **лиси́ца степна́я** ҡарһаҡ (төлкө)

**ЛИСИ́ЧКА I** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **лиси́ца** бала төлкө

**ЛИСИ́ЧКА II** *ж* һары бәшмәк, селтәр бәшмәк

**ЛИСОХВО́СТ** *м* төлкөгойроҡ (*ҡыяҡ үлән*), мысай

**ЛИСТ** *м* **1.** (*мн.* **ли́стья**) япраҡ; **гера́ниевый лист** яран япрағы; **лавро́вый лист** лавр япрағы **2.** (*мн.* **листы́**) ҡағыҙ; **похва́льный лист** маҡтау

ҡағыҙы **3.** (*мн.* **листы́**) бит, табаҡ; **а́вторский лист** автор табағы; **печа́тный лист** баҫма табаҡ; **пять листо́в желе́за** биш табаҡ тимер ♦ **дрожа́ть как оси́новый лист** уҫаҡ япрағындай ҡалтырауы, нык ҡалтырау (дерелдәү)

**ЛИСТА́Ж** *м*; *полигр.* листаж (*баҫма табаҡ һаны*)

**ЛИСТА́ТЬ** *несов. что* битләп асып ҡарау (*китап һ.б.*)

**ЛИСТВА́** *ж собир.* япраҡтар; **молода́я листва́** йәш япраҡтар

**ЛИ́СТВЕННИЦА** *ж* ҡарағас; **ли́ственница сиби́рская** себер ҡарағасы

**ЛИ́СТВЕННИЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡарағас ...ы; **ли́ственничный лес** ҡарағас урманы

**ЛИ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** япраҡлы; **ли́ственный лес** япраҡлы урман **2.** (*образующийся из листьев*) япраҡ; **ли́ственный перегно́й** япраҡ серетмәһе

**ЛИСТО́ВКА** *ж* листовка; **агитацио́нная листо́вка** агитация листовкаһы

**ЛИСТОВО́Й,** -ая, -ое **1.** япраҡ; **листово́й таба́к** япраҡ тәмәке **2.** табаҡлы; **листова́я бума́га** табаҡлы ҡағыҙ; **листово́е желе́зо** табаҡлы тимер

**ЛИСТОЕ́ДЫ** *мн.* (*ед.* **листое́д** *м*); *зоол.* япраҡ ҡуңыҙы

**ЛИСТО́К** *м* **1.** *уменьш. к* **лист** 1, 2; **2.** (*бланк*) ҡағыҙ, листок; **контро́льный листо́к** контроль ҡағыҙ **3.** *см.* **листо́вка**

**ЛИСТОПА́Д** *м* япраҡ ҡойолоу; **начался́ листопа́д** япраҡ ҡойола башланы

**ЛИТА́ВРЫ** *мн.* (*ед.* **лита́вра** *ж*); *муз.* литавра (*музыка ҡоралы*) ♦ **бить в лита́вры** литавра һуғыу

**ЛИТЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡойоу ...ы; **лите́йный цех** ҡойоу цехы **2.** *в знач. сущ.* **лите́йная** *ж* литейная (*металл иретеү, ҡойоу урыны*)

**ЛИТЕ́ЙЩИК** *м* ҡойоусы

**ЛИ́ТЕР** *м*; *ж.-д.* литер (*тимер юлда һ.б. буш йөрөү йәки льгота менән файҙаланыу өсөн танытма*)

**ЛИ́ТЕРА** *ж* **1.** *уст.* (*буква*) хәреф **2.** *полигр.* металл хәреф

**ЛИТЕРА́ТОР** *м* **1.** әҙип, яҙыусы **2.** әҙәбиәтсе

**ЛИТЕРАТУ́РА** *ж*; *в разн. знач.* әҙәбиәт; **башки́рская литерату́ра** башҡорт әҙәбиәте; **изуча́ть литерату́ру** әҙәбиәтте өйрәнеү

**ЛИТЕРАТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*относящийся к литературе*) әҙәби, әҙәбиәт ...ы; **литерату́рное насле́дство** әҙәби мираҫ; **литерату́рный ве́чер** әҙәбиәт кисәһе **2.** (*соответствующий нормам*) әҙәби; **литерату́рный язы́к** әҙәби тел

**ЛИТЕРАТУРОВЕ́Д** *м* әҙәбиәтсе, әҙәбиәт белгесе

**ЛИТЕРАТУРОВЕ́ДЕНИЕ** *с* әҙәбиәт ғилеме

**ЛИТЕРАТУРОВЕ́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое әҙәбиәт ғилеме буйынса; **литературове́дческие труды́** әҙәбиәт ғилеме буйынса хеҙмәттәр

**ЛИ́ТЕРНЫЙ I,** -ая, -ое (*льготный*) литерлы; **ли́терный биле́т** литерлы билет

**ЛИ́ТЕРНЫЙ II,** -ая, -ое *разг.* литерлы, хәреф менән билдәләнгән; **ли́терное ме́сто** (*в театре*) литерлы урын

**ЛИ́ТИЙ** *м* литий (*химик элемент, металл*)

**ЛИТО́ВСКИЙ,** -ая, -ое литва ...ы, Литва ...ы; **лито́вский язы́к** литва теле; **лито́вский наро́д** литва халҡы

**ЛИТО́ВЦЫ** *мн.* литвалылар, литва халҡы // *ед.* **лито́вец** *м* литва ир-ты; **лито́вка** *ж* литва ҡатын-ҡыҙы

**ЛИТО́ГРАФ** *м* таш баҫмасы, литограф

**ЛИТОГРАФИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* баҫмала баҫыу, литографияла баҫыу

**ЛИТОГРА́ФИЯ** *ж* литография (**1.** *таш баҫмала баҫыу* **2.** *таш баҫмала баҫылған һүрәт* **3.** *таш баҫмала баҫыу цехы*)

**ЛИТОГРА́ФСКИЙ,** -ая, -ое литография ...ы; **литогра́фские кра́ски** литография буяуҙары

**ЛИТО́Й,** -ая, -ое ҡойолған, ҡойоп эшләнгән; **литы́е сапоги́** ҡойоп эшләнгән итек

**ЛИТОСФЕ́РА** *ж*; *геол.* литосфера (*Ер шарының өҫкө ҡаты, Ер ҡабығы*)

**ЛИТР** *м* литр; **литр молока́** бер литр һөт

**ЛИТРА́Ж** *м*; *тех.* литраж (*юлда сарыф ланған мотор яғыулығы күләме*)

**ЛИТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое литрлы, бер литр һыйышлы

**ЛИТЬ** *несов.* **1.** *что* ағыҙыу, түгеү; **лить во́ду** һыу түгеү **2.** ҡойоу, ҡойолоу; **дождь льёт как из ведра́** ямғыр күнәкләп ҡоя **3.** *тех.* ҡойоу; **лить пу́шку** туп ҡойоу **4.** *перен.* (*о свете, запахе*) түгеү, сәсеү, таратыу ♦ **лить во́ду на ме́льницу** *чью-л. кемдеңдер* тирмәненә һыу ҡойоу; **лить ма́сло в ого́нь** утҡа кәрәсин һибеү

**ЛИТЬЁ** *с*; *тех.* **1.** *см.* **лить** 3; **литьё чугуна́** суйын ҡойоу **2.** *собир.* ҡойоп яһалған нәмәләр; **чугу́нное литьё** суйындан ҡойоп яһалған нәмәләр

**ЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ағыу, түгелеү, ҡойолоу; **с лица́ льётся пот** биттән тир аға; **слёзы лью́тся** күҙ йәше түгелә **2.** *перен.* ағылыу; **льётся мело́дия** көй ағыла **3.** *перен.* (*распространяться — о свете, запахе*) таралыу, һибелеү, сәселеү; **лучи́ лью́тся** нур һибелә **4.** *страд. от* **лить** 1, 3, 4

**ЛИФ** *м* лиф; **лиф пла́тья** күлдәк лифы

**ЛИФТ** *м* лифт; **поднима́ться на ли́фте** лифтта күтәрелеү

**ЛИФТЁР** *м* и *разг.* **ЛИФТЁРША** *ж* лифтсы, лифтёр

**ЛИ́ФЧИК** *м* лифчик, күкрәксә

**ЛИХА́Ч** *м*; *неодобр.* дыуамал (алабарман) кеше; **шофёр-лиха́ч** дыуамал шофёр

**ЛИХА́ЧЕСТВО** *с* дыуамаллыҡ, алабарманлыҡ; **показа́ть лиха́чество** дыуамаллыҡ күрһәтеү

**ЛИХВА́: с лихво́й** артығы менән

**ЛИ́ХО** *с*; *уст.* яманлыҡ, яуызлыҡ ♦ **не помина́йте ли́хом** яманлап иҫкә алмағыҙ

**ЛИХОИ́МЕЦ** *м*; *уст.* ришүәтсе

**ЛИХОИ́МСТВО** *с*; *уст.* ришүәтселек

**ЛИХО́Й I,** -ая, -ое *уст.* (*злой*) яуыз, яман; **лихо́й челове́к** яуыз кеше; **лихо́е де́ло** яман эш ♦ **лиха́ беда́ нача́ло** башлауы (башлап ебәреүе) ғына ҡыйын

**ЛИХО́Й II,** -ая, -ое **1.** сая, ҡыйыу, тәүәккәл; **лихо́й нае́здник** ҡыйыу һыбай(лы); **лихо́й челове́к** ҡыйыу кеше **2.** (*задорный*) ярһыу, дәртле, ялҡынлы; **лиха́я пля́ска** дәртле бейеү; **лиха́я пе́сня** ялҡынлы йыр **3.** (*искусный*) оҫта; **лихо́й танцо́р** оҫта бейеүсе

**ЛИХОЛЕ́ТЬЕ** *с*; *уст.* ауыр замана, ауыр йылдар

**ЛИХОРА́ДИТЬ** *несов.* **1.** *кого-что безл.* тапма (биҙгәк) тотоу, ҡалтырау, дерелдәү, дерелдәтеү; **больно́го лихора́дит** ауырыу ҡалтырай **2.** *безл.*; *перен.* ығы-зығы сығарыу, буталсыҡ килеп сығыу; **стро́йку лихора́дит** төҙөлөштә буталсыҡ килеп сыҡҡан

**ЛИХОРА́ДКА** *ж* **1.** тапма, биҙгәк; **боле́ть лихора́дкой** биҙгәк менән ауырыу, биҙгәк тотоу **2.** *перен.*, *разг.* ығы-зығы, буталсыҡлыҡ; **биржева́я лихора́дка** биржалағы ығы-зығы

**ЛИХОРА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*о человеке*) тапма (биҙгәк) менән ауырыған, тапма (биҙгәк) тотҡан; **лихора́дочный челове́к** биҙгәк тотҡан кеше **2.** (*такой, какой бывает при лихорадке*) тапма (биҙгәк) тотҡандағы; **лихора́дочный жар** тапма тотҡандағы эҫелек **3.** *перен.* ҡабалан, ашығыс; **лихора́дочная рабо́та** ҡабалан эш

**ЛИЦЕВА́ТЬ** *несов. что* **1.** әйләндереп тегеү; **лицева́ть брю́ки** салбарҙы әйләндереп тегеү **2.** *спец.* (*облицовывать*) тышлау

**ЛИЦЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** бит ...ы, йөҙ ...ы; **лицевы́е му́скулы** бит мускулдары **2.** тышҡы, өҫкө, алғы, уң; **лицева́я сторона́ зда́ния** бинаның алғы яғы; **лицева́я сторона́ мате́рии** туҡыманың уң яғы **3.** *спец.* рәсемле, биҙәкле ♦ **лицево́й счёт** *фин.* шәхси счёт

**ЛИЦЕИ́СТ** *м* лицейҙа уҡыусы

**ЛИЦЕ́Й** *м* лицей; **откры́ть лице́й** лицей асыу; **учи́ться в лице́е** лицейҙа уҡыу

**ЛИЦЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое лицей, лицейҙағы

**ЛИЦЕМЕ́Р** *м* юха, ике йөҙлө кеше

**ЛИЦЕМЕ́РИЕ** *с* ике йөҙлөлөк, эскерлелек

**ЛИЦЕМЕ́РИТЬ** *несов.* ике йөҙлөлөк күрһәтеү, ике йөҙләнеү

**ЛИЦЕМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое ике йөҙлө, эскерле; **лицеме́рный челове́к** ике йөҙлө кеше

**ЛИЦЕ́НЗИЯ** *ж*; *эк.* лицензия (*хөкүмәт тарафынан бирелгән рөхсәт ҡағыҙы*)

**ЛИЦЕПРИЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* яҡлаулы, яҡлауға нигеҙләнгән; **лицеприя́тное реше́ние** яҡлауға нигеҙләнгән ҡарар

**ЛИЦО́** *с* **1.** бит, йөҙ, төҫ, сырай; **угрю́мое лицо́** ҡараңғы сырай; **серди́тое лицо́** асыулы йөҙ; **отрази́ться на лице́** йөҙгә сығыу **2.** (*человек*) шәхес, кеше; **истори́ческое лицо́** тарихи шәхес; **официа́льное лицо́** рәсми кеше **3.** *грам.* зат; **катего́рия лица́** зат категорияһы; **измене́ние по ли́цам** зат менән үҙгәртеү ♦ **в по́те лица́** тир түгеп; **лица́ нет** *на ком* төҫө ҡасҡан; **знать в лицо́** *кого* күреп белеү; **лицо́м в грязь не уда́рить** йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәү; **лицо́м к лицу́** йөҙгә-йөҙ (осрашыу, тап килеү); **физи́ческое лицо́** *юр.* хоҡуҡҡа эйә кеше, физик шәхес; **на лице́ напи́сано** *что* йөҙөнә сыҡҡан; **пе́ред лицо́м** *кого-чего* алдында, ҡаршыһында; **с лица́ земли́ стере́ть** юҡ итеү, һәләк итеү; **смотре́ть (гляде́ть) в лицо́** *чему* күҙенә ҡарау

**ЛИЧИ́НА** *ж* **1.** битлек, ялған йөҙ; **сбро́сить личи́ну** битлекте ташлау, йөҙҙө асыу **2.** *тех.* (*у замка*) йоҙаҡ йөҙлөгө

**ЛИЧИ́НКА** *ж*; *зоол.* ҡарышлауыҡ; **личи́нка о́вода** уҡра

**ЛИ́ЧНО** *нареч.* үҙе; **яви́ться ли́чно** үҙе килеү

**ЛИ́ЧНОСТЬ** *ж* шәхес, шәхсиәт; **истори́ческая ли́чность** тарихи шәхес; **культ ли́чности** шәхес культы

**ЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** шәхси; **ли́чная жизнь** шәхси тормош **2.** *грам.* эйәле, зат; **ли́чное предложе́ние** эйәле һөйләм; **ли́чные местоиме́ния** зат алмаштары ♦ **ли́чный соста́в** бар булған хеҙмәткәрҙәр (*предприятиеның, хәрби бүлектең һ.б.*)

**ЛИША́Й** *м*; *мед.* тимрәү

**ЛИША́ЙНИК** *м* лишай, мүк (*ташта, ағас ҡайырында үҫкән түбән төҙөлөшлө ябай үҫемлек*)

**ЛИША́ТЬ** *несов. см.* **лиши́ть**

**ЛИША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **лиши́ться** **2.** *страд. от* **лиша́ть**

**ЛИШЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **лиши́ть, лиши́ться**; **лише́ние свобо́ды** иректән мәхрүм итеү **2.** *обычно мн.* **лише́ния** мохтажлыҡ, фәҡирлек; **терпе́ть лише́ния** мохтажлыҡ кисереү

**ЛИШИ́ТЬ** *сов. кого-что* мәхрүм итеү, -һыҙ/-һеҙ ҡалдырыу; **лиши́ть свобо́ды** иректән мәхрүм итеү; **лиши́ть по́мощи** ярҙамһыҙ ҡалдырыу; **лиши́ть прав** хоҡуҡтан мәхрүм итеү ♦ **лиши́ть жи́зни** *кого* үлтереү

**ЛИШИ́ТЬСЯ** *сов. кого-чего* мәхрүм булыу (ҡалыу), яҙыу, юғалтыу, -һыҙ/-һеҙ ҡалыу; **лиши́ться дове́рия** ышаныс юғалтыу; **лиши́ться рассу́дка** аҡылдан яҙыу; **лиши́ться зре́ния** һуҡырайыу

**ЛИ́ШНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*избыточный*) артыҡ; **ли́шний скот** артыҡ мал **2.** (*ненужный*) артыҡ, кәрәге булмаған; **ли́шний разгово́р** артыҡ хәбәр **3.** (*дополнительный*) тағы; **взгляну́ть ли́шний раз** тағы бер тапҡыр ҡарап алыу ♦ **без ли́шних слов** артыҡ һөйләнеп тормай; **не бу́дет ли́шним** эсте тишмәҫ; **сказа́ть ли́шнее** ярамағанды әйтеп ташлау; **счита́ть ли́шним** артыҡһыныу

**ЛИШЬ** *частица и союз* **1.** *частица* (*для выделения, ограничения*; *в значении "только"*) бары (тик) бер генә, фәҡәт, ғына (генә, ҡына, кенә); **лишь о себе́ забо́титься** фәҡәт үҙ яйын ҡарау; **у меня́ лишь одна́ забо́та** минең тик бер генә ҡайғым бар

**2.** *союз* (*для присоединения придаточных предложений времени, цели*; *в значении "как только", "только для того чтобы"*) ғына, генә, ҡына, кенә, -ғас та/-гәс тә, уҡ/үк; **лишь то́лько со́лнце взошло́, мы вста́ли** беҙ ҡояш ҡалҡҡас та торҙоҡ

**ЛОБ** *м* маңлай; **широ́кий лоб** киң маңлай; **скла́дки на лбу** маңлайҙағы һырҙар ♦ **на лбу напи́сано** маңлайына яҙып ҡуйылған (*күренеп тора, ап-асыҡ*); **лоб в лоб** ҡара-ҡаршы барыу (осрашыу һ.б.); **что в лоб, что по́ лбу** барыбер

**ЛОБА́СТЫЙ,** -ая, -ое *прост.* киң маңлайлы

**ЛОБЗА́ТЬ** *несов. кого-что*; *уст., трад.-поэт.* үбеү

**ЛО́БЗИК** *м*; *тех.* лобзик (*йоҡа тар бысҡы*)

**ЛОБКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *анат.* түмһәкәй ...ы; **лобко́вые ко́сти** түмһәкәй һөйәктәре

**ЛО́БНЫЙ,** -ая, -ое маңлай ...ы; **ло́бная кость** маңлай һөйәге ♦ **ло́бное ме́сто** *ист.* ҡалҡыу урын (*батша бойороҡтарын иғлан итеү, кешеләрҙе язалау урыны*)

**ЛОБОВО́Й,** -ая, -ое *спец.* **1.** (*направленный в упор*) ҡапма-ҡаршы, ҡаршы, туп-тура; **лобово́й ве́тер** ҡаршы ел **2.** (*передний*) алдағы, алғы; **лобово́е стекло́ маши́ны** машинаның алғы быялаһы

**ЛОБОГРЕ́ЙКА** *ж* лобогрейка, урғыс машина

**ЛОБО́К** *м*; *анат.* түмһәкәй

**ЛОБОТРЯ́С** *м*; *прост.* эшлекһеҙ, ялҡау

**ЛОБОТРЯ́СНИЧАТЬ** *несов.*; *прост.* эшһеҙ йөрөү, ялҡаулыҡҡа бирелеү

**ЛОВ** *м см.* **лови́ть** 1; **лов ры́бы** балыҡ тотоу

**ЛОВЕЛА́С** *м* аҙғын, йөрөмтәл (*ҡатын-ҡыҙҙар артынан күп йөрөүсе аҙғын ир*)

**ЛОВЕ́Ц** *м* (*рыболов*) балыҡсы, балыҡ аулаусы; (*охотник*) аусы, һунарсы ♦ **на ловца́ и зверь бежи́т** бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына

**ЛОВИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** тотоу, ҡаптырыу (*ҡармаҡҡа*), эләктереү (*ҡапҡанға*), аулау; **лови́ть ры́бу** балыҡ ҡаптырыу; **лови́ть мяч** туп тотоу; **лови́ть зве́ря капка́ном** йәнлекте ҡапҡанға эләктереү **2.** (*выслеживать кого-л., чтобы задержать*) туҡтатыу, тотоу; **лови́ть престу́пника** енәйәтсене тотоу **3.** *перен.* тотоу, тура килтереү ♦ **лови́ть взгляд** ҡарашын тотоу; **лови́ть на сло́ве** *кого*: 1) һүҙендә торорға мәжбүр итеү; 2) һүҙен эләктереп алыу; **лови́ть ры́бу в му́тной воде́** кеше ҡазаһынан файҙаланып ҡалыу, болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоу; **лови́ть мух** ел ҡыуыу

**ЛОВИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡабыу, эләгеү, тотолоу **2.** *страд. от* **лови́ть**

**ЛОВКА́Ч** *м*; *разг.* сос, таһыллы, йылғыр (үткер) кеше

**ЛО́ВКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*подвижный, гибкий*) сос, таһыллы, етеҙ, йылғыр; **ло́вкий па́рень** йылғыр егет; **ло́вкий в движе́ниях** етеҙ хәрәкәтле, хәрәкәтсән **2.** (*искусный*) оҫта; **ло́вкий нае́здник** (атта) оҫта йөрөүсе **3.** (*хитрый, изворотливый*) хәйләле, мут, оҫта; **ло́вкий шаг** оҫта аҙым **4.** *разг.* (*удобный*) яйлы, уңайлы; **ло́вкое седло́** яйлы эйәр

**ЛО́ВКОСТЬ** *ж* оҫталыҡ, сослоҡ, таһыллыҡ, етеҙлек, йылдамлыҡ; **прояви́ть ло́вкость** сослоҡ күрһәтеү

**ЛО́ВЛЯ** *ж* **1.** *см.* **лови́ть**; **лови́ть медве́дя** айыу алыу (аулау); **ло́вля силка́ми** тоҙаҡ менән тотоу; **ры́бная ло́вля** балыҡ тотоу

**ЛОВУ́ШКА** *ж*; *в разн. знач.* ау, тоҙаҡ, ҡапҡан, ауын, тәпе; **лову́шка для птиц** ауын; **лову́шка для медве́дя** айыу тәпеһе; **ста́вить лову́шку** ау ҡороу; **попа́сть в лову́шку** ҡапҡанға эләгеү; **стро́ить лову́шку** ҡапҡан ҡороу; **ми́нная лову́шка** *воен.* миналарҙан ҡоролған тоҙаҡ

**ЛО́ВЧИЙ,** -ая, -ее **1.** һунар ...ы; **ло́вчая пти́ца** һунар ҡошо (*бөркөт, шоңҡар һ.б.*) **2.** (*служащий для ловли*) йәнлек тотоу өсөн ҡоролған; **ло́вчая я́ма** һунар соҡоро

**ЛОВЧИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* хәйләләү

**ЛОГ** *м* ҡул, ҡулауыҡ, үҙән

**ЛОГАРИ́ФМ** *м*; *мат.* логарифм (*дәрәжә күрһәткесе*); **табли́ца логари́фмов** логарифм таблицаһы

**ЛОГАРИФМИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *мат.* логарифмлау (*бирелгән һандың логарифмын табыу*)

**ЛОГАРИФМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *мат.* логарифм ...ы; **логарифми́ческая лине́йка** логарифм линейкаһы

**ЛО́ГИКА** *ж*; *в разн. знач.* логика; **форма́льная ло́гика** формаль логика; **ло́гика поведе́ния** тәртип логикаһы

**ЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое логик, логика; **логи́ческие зако́ны** логика закондары (ҡанундары); **логи́ческие катего́рии** логика категориялары; **логи́ческое ударе́ние** *лингв.* логик баҫым

**ЛОГИ́ЧНОСТЬ** *ж* логикаға нигеҙләнгән булыу, аҡылға (башҡа) һыймалы (һыя торған) булыу, ятышлы булыу

**ЛОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** логик, логикаға нигеҙләнгән; **логи́чные до́воды** логикаға нигеҙләнгән дәлилдәр **2.** (*последовательный*) эҙмә-эҙлекле, дөрөҫ, законлы; **логи́чный подхо́д** эҙмә-эҙлекле ҡараш

**ЛО́ГОВИЩЕ** и **ЛО́ГОВО** *с*; *прям., перен.* өң, ояяла, ятаҡ (*кейек-йәнлектең ятып йөрөгән урыны*); **во́лчье ло́гово** бүре ояһы; **ло́гово врага́** *перен.* дошман өңө

**ЛОГОПЕ́Д** *м* логопед, логопедия белгесе

**ЛОГОПЕ́ДИЯ** *ж* логопедия (*педагогиканың телмәр етешһеҙлектәрен, тотлоғоуҙы, һаҡаулыҡты бөтөрөү ысулдарын өйрәнеүсе бүлеге*)

**ЛО́ДЖИЯ** *ж* лоджия; **кварти́ра с ло́джией** лоджиялы фатир

**ЛО́ДКА** *ж* кәмә, ҡайыҡ; **па́русная ло́дка** елкәнле кәмә; **рези́новая ло́дка** резина кәмә; **подво́дная ло́дка** һыу аҫты кәмәһе; **ката́ться на ло́дке** кәмәлә йөрөү

**ЛО́ДОЧНИК** *м* кәмәсе

**ЛО́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое кәмә ...ы; **ло́дочная ста́нция** кәмә станцияһы

**ЛОДЫ́ЖКА** *ж*; *анат.* шайтан ашығы, бәкәл

**ЛО́ДЫРНИЧАНЬЕ** *с*; *разг. см.* **ло́дырничать**

**ЛО́ДЫРНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ялҡауланыу, ялҡаулыҡҡа бирелеү

**ЛО́ДЫРЬ** *м*; *разг.* ялҡау, эш һөймәҫ кеше; **отъя́вленный ло́дырь** ата ялҡау ♦ **ло́дыря гоня́ть** *прост.* түшәмгә төкөрөп ятыу, эшһеҙ тик йөрөү

**ЛО́ЖА I** *ж*; *театр.* ложа; **сиде́ть в ло́же** ложала ултырыу

**ЛО́ЖА II** *ж* ложа (*масондар ойошмаһы бүлеге*)

**ЛО́ЖА III** *ж*; *уст. воен.* ложа (*мылтыҡтың, автоматтың ағас өлөшө*)

**ЛОЖБИ́НА** *ж* уйпат (уйһыу) урын, тар үҙәк; **дере́вня располо́жена в ложби́не** ауыл уйһыу урында ултырған

**ЛО́ЖЕ I** *с* **1.** *уст.*, *трад.-поэт.* түшәк; **бра́чное ло́же** никах түшәге **2.** (*русло*) үҙәк, йырҙа; **ло́же реки́** йылға үҙәге ♦ **прокру́стово ло́же** прокруст ҡалыбы (*тар, ҡыҫыҡ үлсәм*)

**ЛО́ЖЕ II** *с*; *воен. см.* **ло́жа** III

**ЛО́ЖЕЧКА** *ж*; *уменьш. от* **ло́жка** 1 ♦ **боли́т под ло́жечкой** күкрәк ауыҙы ауырта

**ЛО́ЖЕЧНИК** *м* **1.** (*мастер*) ҡалаҡсы, ҡалаҡ яһаусы **2.** ҡалаҡтар шаҡылдатып уйнаусы

**ЛОЖИ́ТЬСЯ** *несов. см.* **лечь**

**ЛО́ЖКА** *ж* **1.** ҡалаҡ; **ча́йная ло́жка** балғалаҡ; **деревя́нная ло́жка** ағас ҡалаҡ; **столо́вая ло́жка** аш ҡалағы; **есть ло́жкой** ҡалаҡ менән ашау **2.** *мн.* **ло́жки** ҡалаҡтар (*ҡалаҡ рәүешендәге халыҡ музыка ҡоралы*) ♦ **ло́жка дёгтя в бо́чке мёда** бер ҡалаҡ дегет бер мискә балды боҙор; **в час по ча́йной ло́жке** онотҡанда бер (*әкрен*)

**ЛО́ЖНОСТЬ** *ж* ялғанлыҡ, алдаҡ

**ЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялған; **ло́жный докуме́нт** ялған документ; **ло́жные слу́хи** ялған хәбәрҙәр **2.** (*мнимый*, *притворный*) яһалма, уйҙырма, алдаҡ; **ло́жная ата́ка** яһалма атака **3.** тәбиғи булмаған; **ло́жное самолю́бие** яһалма мин-минлек ♦ **ло́жный шаг** хата аҙым; **ло́жное положе́ние** ҡыйын (асыҡланмаған) хәл

**ЛОЖЬ** *ж* ялған (һүҙ), алдаҡ; **на́глая ложь** оятһыҙ алдаҡ; **распространя́ть ложь** ялған һүҙ таратыу

**ЛОЗА́** *ж* **1.** (*ива*) тал **2.** (*стебель*) сыбыҡ, һыйғыр сыбыҡ; **и́вовая лоза́** тал сыбығы

**ЛОЗИ́НА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **лоза́** 1; **2.** (*ивовый прут*) тал сыбығы

**ЛОЗНЯ́К** *м собир.* таллыҡ

**ЛО́ЗУНГ** *м* лозунг; **вы́двинуть ло́зунг** лозунг күтәреп сығыу

**ЛОКАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **локализова́ть, локализова́ться**; **локализа́ция пожа́ра** янғын таралыуға юл ҡуймау

**ЛОКАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. см.* **локализова́ть**

**ЛОКАЛИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что* сикләү, таралыуҙан туҡтатыу, локалләштереү; **локализова́ть эпиде́мию** эпидемияны локалләштереү

**ЛОКАЛИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* йәйелеүҙән туҡтау, таралмау, ситкә сыҡмау, локалләшеү; **эпиде́мия локализова́лась** эпидемия таралманы **2.** *несов. страд. от* **локализова́ть**

**ЛОКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое локаль, билдәле бер урынға бәйле, урындағы; **лока́льная война́** локаль һуғыш

**ЛОКА́ТОР** *м*; *тех.* локатор

**ЛОКА́УТ** *м* локаут (*эш урынын ябып, эшселәрҙе күпләп эштән сығарыу*); **объяви́ть лока́ут** локаут иғлан итеү

**ЛОКАУТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* локаут белдереү

**ЛОКОМОБИ́ЛЬ** *м* локомобиль

**ЛОКОМОТИ́В** *м* локомотив; **машини́ст локомоти́ва** локомотив машинисы

**ЛО́КОН** *м* бөҙрә (*бөҙрә сәс шәлкеме*)

**ЛО́КОТЬ** *м* терһәк; **опере́ться на ло́коть** терһәкләнеү, терһәккә таяныу; **почини́ть ло́коть руба́шки** күлдәк терһәген ямау ♦ **ло́кти (себе́) куса́ть** терһәкте тешләү (үкенеү); **чу́вство ло́ктя** берҙәмлек тойғоһо

**ЛОКТЕВО́Й,** -ая, -ое терһәк ...ы; **локтева́я кость** терһәк һөйәге

**ЛОМ I** *м* лом; **долби́ть ло́мом** лом менән тишеү

**ЛОМ II** *м собир.* металл һынығы, тимер-томор

**ЛО́МАНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ватыҡ, ватылған, һынған; **ло́маный замо́к** ватыҡ йоҙаҡ **2.** *перен.* (*исковерканный*, *неправильный — о речи, языке*) боҙолған, боҙоп әйтелгән ♦ **ло́маная ли́ния** *мат.* һыныҡ һыҙыҡ; **ло́маного гроша́ не сто́ит** һуҡыр тин дә тормай

**ЛОМА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* ватыу, һындырыу; **лома́ть игру́шку** уйынсыҡты ватыу; **лома́ть су́чья** ботаҡтарҙы һындырыу **2.** емереү, боҙоу; **лома́ть сара́й** һарайҙы емереү; **лома́ть печь** мейесте боҙоу **3.** *перен.* ватыу, емереү, үҙгәртеү; **лома́ть ста́рые поря́дки** иҫке тәртиптәрҙе емереү ♦ **ко́пья лома́ть** *из-за чего* әрләшеү, талашыу; **лома́ть го́лову** *над чем* баш ватыу; **лома́ть ру́ки** өҙгөләнеү, ни эшләргә белмәү; **лома́ть ша́пку** *перед кем* баш эйеү; **лома́ть спи́ну** бил бөгөү

**ЛОМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һыныу, ватылыу, онталыу; **сухи́е су́чья легко́ лома́ются** ҡоро ботаҡтар

тиҙ һына; **лёд лома́ется** боҙ ватыла **2.** *перен.* боҙолоу, үҙгәреү; **его́ хара́ктер лома́ется** уның холҡо боҙола **3.** *перен.* (*кривляться, жеманничать*) наҙланып ҡыланыу, борғаланыу; **не лома́йся!** ҡыланма! **4.** *страд. от* **лома́ть**

**ЛОМБА́РД** *м* ломбард; **заложи́ть ве́щи в ломба́рд** әйберҙе ломбардҡа һалыу

**ЛОМИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что*; *разг.* эйеү, бөгөү, һығылдырыу; **ве́тер ло́мит ве́тки** ел ботаҡтарҙы эйә **2.** *разг.* (*валить толпой*) тапап килеү (барыу), инеп килеү; **наро́д так и ло́мит** халыҡ тапап килә **3.** *что* и *без доп. безл.* һыҙлау; **ло́мит в суста́вах** быуындар һыҙлай; **те́ло ло́мит** тән һыҙлай (ватылып килә)

**ЛОМИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*гнуться под тяжестью*) эйелеп (бөгөлөп, һығылып) төшөү; **по́лки ло́мятся от тя́жести книг** кәштә китап ауырлығынан һығылып төшкән (һығылған) **2.** *разг.* (*идти напролом*) баҫып килеү, тапап барыу, емереп алып барыу; **ломи́ться в дверь** ишекте емереп алып барыу ♦ **ломи́ться в откры́тую дверь** асыҡ ишекте емереп инеү (*билдәле булған нәмәне иҫбат итергә тырышыу*)

**ЛО́МКА** *ж см.* **лома́ть**

**ЛО́МКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*хрупкий*) мурт, ватылыусан, ыуалыусан, һыныусан; **ло́мкое де́рево** мурт ағас **2.** (*о голосе*) үҙгәреүсән, күсеүсән

**ЛО́МКОСТЬ** *ж* һыныусанлыҡ

**ЛОМОВИ́К** *м*; *разг.* ломовой, йөк ташыусы

**ЛОМОВО́Й,** -ая, -ое йөк ...ы; **ломова́я ло́шадь** йөк аты

**ЛОМО́ТА** *ж*; *разг.* һыҙлау, һыҙланыу, һынығыу (*быуындарға ҡарата*); **ломо́та в поясни́це** бил һыҙлау

**ЛОМО́ТЬ** *ж* телем, һыныҡ ♦ **отре́занный ломо́ть** ситләшкән, ятҡа әйләнгән кеше

**ЛО́НО** *с*; *трад.-поэт.* ҡуйын, ҡосаҡ; **вы́йти на ло́но приро́ды** тәбиғәт ҡосағына сығыу

**ЛО́ПАСТНЫЙ,** -ая, -ое ҡалаҡ(лы), көрәк(ле); **ло́пастное колесо́** ҡалаҡлы тәгәрмәс; **ло́пастный лист** *бот.* көрәк япраҡ

**ЛО́ПАСТЬ** *ж* ҡалаҡ, көрәк башы; **ло́пасть винта́** винт башы; **ло́пасть за́ступа** осло тимер көрәк башы

**ЛОПА́ТА** *ж* көрәк; **деревя́нная лопа́та** ағас көрәк; **желе́зная лопа́та** тимер көрәк; **копа́ть зе́млю лопа́той** ерҙе көрәк менән ҡаҙыу ♦ **борода́ лопа́той** көрәк һаҡал

**ЛОПА́ТКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **лопа́та** **2.** *анат.* ҡалаҡ һөйәге **3.** ҡалаҡ; **лопа́тка для разме́шивания те́ста** ҡамыр болғау ҡалағы ♦ **положи́ть на о́бе лопа́тки** *кого*: 1) *спорт.* арҡаһына әйләндереп (салҡан) һалыу, йығыу; 2) еңеү, еңеп сығыу

**ЛО́ПАТЬ** *несов. что*; *прост.* тығыныу, туймаҫтай булып (емереп) ашау

**ЛОПА́ТОЧКА** *ж*; *этн.* мәләү, ҡалаҡ; **лопа́точка для конопа́чения** мүк ҡалағы; **лопа́точка для сгреба́ния пчели́ного ро́я** ҡорт ҡалағы

**ЛО́ПАТЬСЯ** *несов.* **1.** ярылыу, шартлау, сатнау; **ло́паться от хо́лода** һыуыҡҡа сатнау **2.** *перен.*, *разг.* (*терпеть крах*) бөлөү, юҡҡа сығыу, бөтөү ♦ **терпе́ние ло́пается** түҙемлек бөтә, түҙерлек (сыҙарлыҡ) әмәл ҡалмай

**ЛО́ПНУТЬ** *сов.* **1.** ярылыу, шартлау, сатнау, ватылыу, өҙөлөү; **стака́н ло́пнул** стакан шартланы; **струна́ ло́пнула** ҡыл өҙөлдө **2.** (*о нарыве, гнойнике и т.п.*) һытылыу **3.** *перен.*, *разг.* (*потерпеть крах*) бөлөү, юҡҡа сығыу, бөтөү; **всё де́ло ло́пнуло** бөтә эш юҡҡа сыҡты ♦ **терпе́ние ло́пнуло** сыҙар хәл ҡалманы

**ЛОПОТА́ТЬ** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* бытылдау, бытырлау

**ЛОПОУ́ХИЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* ҡарпыш, һалпы (ҡолаҡ); **лопоу́хий щено́к** һалпы ҡолаҡлы көсөк **2.** *прост.* (*простоватый — о человеке*) хәйләһеҙ, бер ҡатлы (кеше)

**ЛОПУ́Х** *м* **1.** *бот.* дегәнәк, әрекмән; **лист лопуха́** дегәнәк япрағы **2.** *перен.* (*о глупом человеке, простаке*) хәйләһеҙ (эскерһеҙ, бер ҡатлы) кеше

**ЛОПУХО́ВЫЙ,** -ая, -ое дегәнәк ...ы; **лопухо́вые за́росли** дегәнәк ҡыуаҡтары; **лопухо́вый лист** дегәнәк япрағы

**ЛОПУ́ШНИК** *м* дегәнәклек

**ЛОРД** *м* лорд (*Англияла нәҫелдән килгән юғары дворянлыҡ титулы һәм шул титулдағы кеше*); **пала́та ло́рдов** лордтар палатаһы

**ЛОРНЕ́Т** *м* лорнет (*тотҡалы күҙлек*)

**ЛОСЁНОК** *м* мышы балаһы

**ЛОСИ́НА** *ж* **1.** (*выделанная кожа лося или оленя*) мышы күне **2.** (*мясо*) мышы ите **3.** **лоси́ны** *мн.* (*плотно облегающие штаны*) лосины

**ЛОСИ́НЫЙ,** -ая, -ое мышы ...ы; **лоси́ное мя́со** мышы ите; **лоси́ные рога́** мышы мөгөҙө

**ЛОСК** *м*; *прям.*, *перен.* (*глянец, блеск*) ялтырауыҡ, ялтыр; **сапоги́ с ло́ском** ялтырауыҡлы итек; **вне́шний лоск** тышҡы ялтырауыҡ ♦ **лоск сошёл** *с кого* кикрего төшкән

**ЛО́СКУТ** *м собир.* киҫәктәр, ҡалдыҡ-боҫтоҡ (*мәҫ., күн эшкәртеүҙә*)

**ЛОСКУ́Т** *м* ҡорама, ҡыйыҡ, ҡырҡынды; **собира́ть лоску́тья** ҡорама йыйыу; **сшива́ть лоскуты́** ҡорама ҡорау

**ЛОСКУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡорама; **лоску́тное одея́ло** ҡорама юрған

**ЛОСНИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** йылҡылдау; **ко́ни лосня́тся** аттар йылҡылдап тора **2.** ялтырау, ҡайышланып китеү; **рукава́ лосня́тся** еңдәр ҡайышланып киткән

**ЛОСОСЁВЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөмбаш ...ы; **лососёвый заво́д** һөмбаш үрсетеү заводы **2.** *в знач. сущ.* **лососёвые** *мн.*; *зоол.* һөмбаштар, һөмбаш һымаҡтар

**ЛОСОСИ́НА** *ж* һөмбаш ите

**ЛОСО́СЬ** *м* һөмбаш (*балыҡ*)

**ЛОСЬ** *м* мышы; **лоси́ха** *ж* инә мышы

**ЛОСЬО́Н** *м* лосьон (*битте, ҡулды һ.б. таҙартыу өсөн хуш еҫле шыйыҡса*)

**ЛОСЯ́ТИНА** *ж* мышы ите

**ЛОСЯ́ТНИК** *м* **1.** (*охотник*) мышы аулаусы **2.** (*помещение*) мышы кәртәһе (*ялан кәртә*)

**ЛОТ** *м*; *мор.* лот (*һыу тәрәнлеген үлсәгес*)

**ЛОТЕРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое лотерея ...ы; **лотере́йный биле́т** лотерея билеты

**ЛОТЕРЕ́Я** *ж* лотерея; **вы́играть в лотере́ю** лотереяға отоу

**ЛОТО́** *с нескл.* лото (*отош уйыны*)

**ЛОТО́К** *м* **1.** (*у разносчиков*) тартма, лоток (*һатыу итеү өсөн*) **2.** (*жёлоб*) улаҡ; **ме́льничный лото́к** тирмән улағы

**ЛО́ТОС** *м* лотос (*үҫемлек*)

**ЛОТО́ЧНИК** *м* и **ЛОТО́ЧНИЦА** *ж* лотокта һатыусы

**ЛОТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое лоток ...ы, лотоктан; **лото́чная торго́вля** лотоктан һатыу итеү

**ЛОХА́НКА** и **ЛОХА́НЬ** *ж* лаҡан; **лоха́нь воды́** бер лаҡан һыу

**ЛОХМА́ТИТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* туҙҙырыу, болартыу, туҙғытыу

**ЛОХМА́ТИТЬСЯ** *несов.* туҙыу, туҙғыу, боларыу

**ЛОХМА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялбыр (йөнлө), йөнтәҫ; **лохма́тый пёс** ялбыр эт **2.** боларған, туҙған, туҙғыған; **лохма́тые во́лосы** туҙған сәс

**ЛОХМО́ТЬЯ** *только мн.* иҫке-моҫҡо; **ходи́ть в лохмо́тьях** иҫке-моҫҡо кейеп йөрөү

**ЛО́ХМЫ** *только мн.*; *прост.* кейеҙләнгән сәс, йөн

**ЛО́ЦИЯ** *ж*; *спец.* лоция

**ЛО́ЦМАН** *м* **1.** *мор.* лоцман (*фарватерҙы яҡшы белеүсе һәм унан суднолар үткәреүсе*) **2.** *зоол.* диңгеҙ балығының бер төрө

**ЛОШАДИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** ат ...ы; **лошади́ное ржа́нье** ат кешнәүе **2.** *разг.* (*очень крепкий — о здоровье*) аттай, ат кеүек ♦ **лошади́ная си́ла** *тех.* ат көсө (*кеүәт үлсәү берәмеге*); **лошади́ная до́за** күп күләмдәге доза (*саманан тыш ҙур доза*)

**ЛОША́ДНИК** *м*; *разг.* **1.** атһөйәр, ат яратыусы **2.** ат сауҙагәре

**ЛО́ШАДЬ** *ж* йылҡы, ат; **бегова́я ло́шадь** бәйге аты; **верхова́я ло́шадь** менге ат; **рабо́чая ло́шадь** эш аты; **запряга́ть ло́шадь** ат егеү; **ло́шадь с пятно́м на лбу** ҡашҡа ат

**ЛОША́К** *м* ҡасыр (*ишәк менән айғырҙан тыуған йорт хайуаны*) ♦ **от лошака́ ни ло́шадь, ни осёл не роди́тся** ҡасырҙан ат та тыумаҫ, ишәк тә тыумаҫ

**ЛОЩЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ашлы; **лощёная ткань** ашлы туҡыма **2.** ялтыратылған, шыма; **лощёная бума́га** ялтыр (шыма) ҡағыҙ **3.** *перен.* ҡупшы, ҡупшыҡай; **лощёный молодо́й челове́к** ҡупшы егет

**ЛОЩИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ялтыратҡыс, ялтырата торған; **лощи́льный кала́ндр** ялтыратҡыс машина

**ЛОЩИ́НА** *ж* уйһыулыҡ, үҙән, ҡул

**ЛОЩИ́ТЬ** *несов. что* ялтыратыу, шымартыу; **лощи́ть бума́гу** ҡағыҙҙы ялтыратыу

**ЛОЯ́ЛЬНОСТЬ** *ж* лояллек, лояль ҡараш

**ЛОЯ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое лояль; **лоя́льный челове́к** лояль кеше; **лоя́льное отноше́ние** лояль мөнәсәбәт

**ЛУБ** *м* **1.** (*волокнистая ткань растений*) ҡабыҡ, ҡайыр, күшкә (*ҡайында*); **са́нки из лу́ба** ҡабыҡтан эшләнгән сана **2.** (*лыко*) ҡурыз, сей йүкә, һалабаш; **надра́ть луб** һалабаш һыҙырыу **3.** (*волокнистая ткань льна и т.п.*) сүс

**ЛУБО́К** *м* **1.** (*пласт волокна растений*) ҡабыҡ; **луко́шко из лу́ба** ҡабыҡ тубал; **зама́чивать лубки́ для моча́ла** ҡабыҡ батырыу **2.** *мед.* ҡабыҡ, талыҡ (*һынған һөйәкте ҡуҙғатмай тотоу өсөн ҡуйыла*) **3.** *иск.* лубок (*рәсем баҫып сығарыу өсөн өҫтөнә соҡоп һүрәт яһалған йүкә таҡта*)

**ЛУБО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **лубяно́й** **2.** ҡабыҡҡа төшөрөлгән (*рәсем*) **3.** тупаҫ, урам ...ы; **лубо́чная литерату́ра** урам әҙәбиәте

**ЛУБЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡабыҡтан яһалған, ҡабыҡ ...ы; **лубяны́е са́ни** ҡабыҡ сана; **лубяна́я кры́ша** ҡабыҡ түбә **2.** сүсле; **лубяны́е культу́ры** сүсле культуралар

**ЛУГ** *м* болон, туғай

**ЛУГОВО́ДСТВО** *с*; *с.-х.* болонсолоҡ

**ЛУГОВО́Й,** -ая, -ое болон ...ы, туғай ...ы; **лугово́е се́но** туғай бесәне

**ЛУДИ́ЛЬЩИК** *м* ҡурғашлаусы, ҡурғаш ялатыусы

**ЛУДИ́ТЬ** *несов. что* ҡурғашлау, ҡурғаш йүгертеү

**ЛУ́ЖА** *ж* күләүек; **лу́жи на доро́ге** юлдағы күләүектәр; **угоди́ть в лу́жу** күләүеккә баҫыу ♦ **сесть в лу́жу** төп башына ултырыу, тишек кәмәгә ултырыу

**ЛУЖА́ЙКА** *ж* аҡлан, болон; **лесна́я лужа́йка** урман аҡланы; **игра́ть на лужа́йке** аҡланда уйнау

**ЛУЖЕ́НИЕ** *с см.* **луди́ть**

**ЛУЖЁНЫЙ,** -ая, -ое ҡурғашлы, ҡурғаш йүгертелгән, ҡурғашланған; **лужёная кастрю́ля** ҡурғаш йүгертелгән кәстрүл

**ЛУ́ЗА** *ж*; *спец.* луза (*бильярд өҫтәленең селтәр ҡуйылған тишеге*)

**ЛУЗГА́** *ж собир.* ҡабыҡ; **лузга́ подсо́лнечника** көнбағыш ҡабығы

**ЛУ́ЗГАТЬ** *несов. что*; *прост.* ярыу, ашау (*мәҫ., көнбағыш, сәтләүек һ.б.*)

**ЛУК I** *м* (*растение*) һуған, йыуа; **свя́зка лу́ка** бер бау һуған; **лук-сево́к** ваҡ һуған (*орлоҡ*); **лук-черну́шка** орлоҡ һуғаны; **ди́кий лук** йыуа; **ре́пчатый лук** башлы һуған; **лук-поре́й** киң ҡыяҡлы һуған

**ЛУК II** *м* (*оружие*) ян, йәйә; **стреля́ть из лу́ка** йәйәнән (яндан) атыу

**ЛУКА́** *ж* **1.** (*край седла*) ҡаш, ҡашаға; **пере́дняя лука́ седла́** эйәрҙең алғы ҡашы **2.** (*изгиб*) бөгөл; **лука́ реки́** йылға бөгөлө

**ЛУКА́ВЕЦ** *м*; *разг.* хәйләкәр (мут) кеше

**ЛУКА́ВИТЬ** *несов.* хәйлә (мәкер) ҡороу

**ЛУКА́ВО** *нареч.* хәйлә менән, мәкерләнеп

**ЛУКА́ВСТВО** *с* **1.** мәкерлелек, мәкер, хәйлә **2.** (*игривость*) шаянлыҡ, мәрәкәселлек

**ЛУКА́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәкерле; **лука́вый челове́к** мәкерле әҙәм **2.** (*игривый*) шаян, уйынсаҡ, мәрәкәсел **3.** *сущ.* **лука́вый** *м*; *разг.* ен, шайтан; **лука́вый попу́тал** шайтан араға төштө, шайтан яңылыштырҙы

**ЛУ́КОВИЦА** *ж* **1.** *бот.* һуған(баш); **лу́ковица ли́лии** ләлә һуғанбашы **2.** (*головка лука*) бер баш һуған; **две лу́ковицы** ике баш һуған **3.** *анат.* төп, тамыр; **лу́ковица во́лоса** сәс төбө **4.** (*купол*) сиркәү көмбәҙе

**ЛУ́КОВИЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һуғанбаш ...ы; **лу́ковичные расте́ния** һуғанбаш үҫемлектәр **2.** *в знач. сущ.* **лу́ковичные** *мн.*; *бот.* һуғанбашлылар, йыуа үҫемлектәр

**ЛУ́КОВЫЙ,** -ая, -ое һуған ...ы; **лу́ковые семена́** һуған орлоғо ♦ **го́ре лу́ковое** *шутл.* бисара, меҫкенкәй

**ЛУКОМО́РЬЕ** *с*; *уст.* диңгеҙ ҡултығы

**ЛУКО́ШКО** *с* ҡуҙы, тубал, тырыз; **одно́ луко́шко я́год** бер тырыз еләк ♦ **каково́ луко́шко, такова́ и кры́шка** силәгенә күрә ҡапҡасы

**ЛУНА́** *ж* **1.** ай; **по́лная луна́** тулған ай; **светя́щая луна́** яҡты ай; **затме́ние луны́** ай тотолоу; **серп луны́** ай урағы **2.** *астр.* (*спутник планеты*) эйәрсән; **де́вять лун Сату́рна** Сатурндың туғыҙ эйәрсәне ♦ **как с луны́ свали́лся** күктән төшкәндәй (төшкән һымаҡ)

**ЛУ́НА-ПА́РК** *м* луна-парк

**ЛУНА́-РЫ́БА** *ж* айбалыҡ

**ЛУНАТИ́ЗМ** *м*; *мед.* илереү, һаташыу, лунатиклыҡ (*ауырыу*)

**ЛУНА́ТИК** *м*; *разг.* илерек, лунатик (*йоҡоһонда һаташып тороп йөрөгән кеше*)

**ЛУ́НКА** *ж* **1.** соҡорсоҡ, соҡор, оя; **лу́нка зу́ба** теш соҡоро **2.** *рыб.* мәке

**ЛУ́ННИК** *ж*; *разг.* лунник (*айға төшкән ракета*)

**ЛУ́ННЫЙ,** -ая, -ое ай ...ы, айлы; **лу́нная ночь** айлы төн; **лу́нный свет** ай яҡтыһы; **лу́нное затме́ние** ай тотолоу ♦ **лу́нный год** ай йылы (*ай календары менән иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо — ҡояш йылынан 11 көнгә кәм*)

**ЛУНОХО́Д** *м*; *спец.* луноход

**ЛУНЬ** *м* көйгәнәк (*ҡош*); **лунь боло́тный** һаҙ көйгәнәге; **лунь лугово́й** ялан көйгәнәге; **лунь степно́й** дала көйгәнәге ♦ **седо́й как лунь** сал сәсле

**ЛУ́ПА** *ж* лупа (*ҙурайтып күрһәтә торған быяла*)

**ЛУПИ́ТЬ** *несов.*; *прост.* **1.** *что* (*очищать от коры, шелухи*) һыҙырыу, һыҙыртыу, әрсеү; **лупи́ть ли́пу** йүкә һыҙырыу **2.** *кого* (*бить*) ярыу, йоҙроҡлап туҡмау, дөмбәҫләү; **лупи́ть друг дру́га** дөмбәҫләшеү ♦ **лупи́ть глаза́** күҙ аҡайтыу

**ЛУПИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** (*шелушиться*) төләү, ҡауаҡланып һыҙырылыу, һыҙырылып (ҡубырсып) төшөү, ҡубыу; **ко́жа лу́пится** тире төләй (*ҡауаҡланып ҡуба*); **штукату́рка лу́пится** штукатурка ҡубып төшә **2.** *страд. от* **лупи́ть** 1

**ЛУПОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое *прост.* аҡыш күҙ

**ЛУЧ** *м* **1.** нур, яҡтылыҡ; **лучи́ со́лнца** ҡояш нурҙары; **у́тренние лучи́** таң нурҙары; **озаря́ться луча́ми** нурға (яҡтылыҡҡа) күмелеү **2.** *перен.* нур, атҡы; **луч наде́жды** өмөт атҡыһы **3.** *мн.* **лучи́**; *физ.* нурҙар; **ультрафиоле́товые лучи́** ультрафиолет нурҙар; **испуска́ть лучи́** нур сәсеү

**ЛУЧЕВО́Й,** -ая, -ое *в разн. знач.* нур ...ы; **лучева́я эне́ргия** нур көсө ♦ **лучева́я кость** *анат.* беләк һөйәге; **лучева́я боле́знь** *мед.* нур ауырыуы

**ЛУЧЕЗА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** нурлы, балҡып (нур һибеп) торған; **лучеза́рная звезда́** нурлы йондоҙ **2.** *перен.* ҡыуаныслы, бәхетле, шатлыҡлы; **лучеза́рные наде́жды** ҡыуаныслы өмөттәр; **лучеза́рная улы́бка** шатлыҡлы йылмайыу

**ЛУЧЕИСПУСКА́НИЕ** *с*; *физ.* нур һибеү (сәсеү)

**ЛУЧЕПРЕЛОМЛЕ́НИЕ** *с*; *физ.* нур һынылышы

**ЛУЧИ́НА** и **ЛУЧИ́НКА** *ж* сыра; **щипа́ть лучи́ну** сыра телеү; **жечь лучи́ну** сыра яндырыу

**ЛУЧИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** нурлы, балҡып торған, яҡты; **лучи́стый взгляд** нурлы ҡараш; **лучи́стые глаза́** нурлы күҙҙәр **2.** *физ.* нур ...ы; **лучи́стая эне́ргия** нур энергияһы

**ЛУЧИ́ТЬ** *несов. кого*; *рыб.* сыраҡҡа төшөү (*төнөн сыраҡ яндырып балыҡ сәнсеү*)

**ЛУЧИ́ТЬСЯ** *несов.* нурланыу, нур сәсеү; **её глаза́ луча́тся** уның күҙҙәре нурланып тора

**ЛУЧКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *тех.* йәйә, ян, янға (йәйәгә) оҡшаған; **лучко́вая пила́** йәйә бысҡы

**ЛУ́ЧНИК** *м* и **ЛУ́ЧНИЦА** *ж*; *спорт.* йәйәсе, яндан атыусы

**ЛУ́ЧШЕ** **1.** *сравн. ст. от* **хоро́ший** и **хорошо́** яҡшы, яҡшыраҡ, һәйбәтерәк; **сего́дня пого́да лу́чше, чем вчера́** бөгөн көн кисәгенән яҡшыраҡ **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* яҡшыраҡ; **ей тепе́рь лу́чше** уға хәҙер яҡшыраҡ **3.** *в знач. частицы* (*для подчёркивания предпочтительности какого-л. действия*) ла/лә инде, булмаһа; **лу́чше не спра́шивай** һорама ла инде; **пойдём-ка лу́чше домо́й** ҡайтайыҡ булмаһа ♦ **лу́чше всего́** иң яҡшыһы

**ЛУ́ЧШИЙ,** -ая, -ее **1.** *сравн. ст. от* **хоро́ший** иң яҡшыһы; **лу́чший сорт** иң яҡшы сорт **2.** *в*

*знач. сущ.* **лу́чший** *м*, **лу́чшая** *ж*, **лу́чшее** *с* иң яҡшы ♦ **в лу́чшем слу́чае** иң яҡшыһы, иң яҡшы тигәндә; **всё к лу́чшему** барыһы ла яҡшыға; **в лу́чшем ви́де** (*сделать*) бик һәйбәт итеп (эшләү)

**ЛУЩЁНЫЙ,** -ая, -ое ҡабығынан әрселгән (һыҙырылған)

**ЛУЩИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* һурҙырыу, һурҙыртыу, һыҙырыу, әрсеү; **лущи́льная маши́на** һурҙырғыс машина

**ЛУЩИ́ТЬ** *несов. что* **1.** (*очищать от скорлупы*) һурҙырыу, һурҙыртыу, һыҙырыу, һыҙыртыу, әрсеү, һуйыу; **лущи́ть горо́х** борсаҡ һыҙырыу **2.** (*лузгать*) ярыу; **лущи́ть се́мечки** көнбағыш ярыу **3.** *с.-х.* (*разрыхлять почву*) йомшартыу (*ерҙе*)

**ЛЫ́ЖИ** *мн.* (*ед.* **лы́жа** *ж*) саңғы; **во́дные лы́жи** һыу саңғыһы; **широ́кие лы́жи** яҫы саңғы; **ката́ться на лы́жах** саңғыла шыуыу ♦ **навостри́ть лы́жи** ысҡынырға (шылырға) самалау

**ЛЫ́ЖНИК** *м* и **ЛЫ́ЖНИЦА** *ж* саңғысы; **пробе́г лы́жников** саңғысылар ярышы

**ЛЫ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** саңғы …ы; **лы́жный спорт** саңғы спорты **2.** саңғысы(лар) …ы; **лы́жный отря́д** саңғысылар отряды

**ЛЫЖНЯ́** *ж*; *спорт.* саңғы юлы, саңғы эҙе

**ЛЫ́КО** *с* ҡурыҙ, йүкә; **драть лы́ко** йүкә (ҡурыҙ) һыҙырыу; **ла́пти из лы́ка** йүкә сабата ♦ **во́лчье лы́ко** *бот.* бүре йүкәһе; **лы́ка не вя́жет** *прост.* ныҡ (лаяҡыл) иҫерек, теле лә әйләнмәй; **не лы́ком шит** *прост.* төшөп ҡалғандарҙан түгел

**ЛЫСЕ́ТЬ** *несов.* сәс ҡойолоу, пеләшләнеү, ялтасланыу

**ЛЫ́СИНА** *ж* **1.** (*плешь*) пеләш (ялтас) баш **2.** (*белое пятно на лбу животных*) ҡашҡа; **конь с лы́синой** ҡашҡа ат

**ЛЫСУ́ХА** *ж* ҡашҡабаш, таҙбаш (*һыу ҡошо*)

**ЛЫ́СЫЙ,** -ая, -ое **1.** пеләш башлы, ялтас; **лы́сая голова́** ялтас баш **2.** *перен.* яланғас, шәрә, асыҡ; **лы́сая гора́** яланғас тау

**ЛЬ** *частица* и *союз см.* **ли**

**ЛЬВЁНОК** *м* арыҫлан балаһы

**ЛЬВИ́НЫЙ,** ая, -ое арыҫлан …ы; **льви́ная шку́ра** арыҫлан тиреһе ♦ **льви́ный зев** *бот.* арыҫлан ауыҙы (*үлән*); **льви́ная до́ля** иң яҡшы (ҙур) өлөш

**ЛЬВИ́ЦА** *ж* инә арыҫлан

**ЛЬГО́ТА** *ж* льгота, ташлама; **дать льго́ту** льгота биреү

**ЛЬГО́ТНЫЙ,** -ая, -ое льготалы, өҫтөнлөклө; **на льго́тных усло́виях** өҫтөнлөклө шарттарҙа

**ЛЬДИ́НА** *ж* ҙур боҙ (киҫәге), боҙ

**ЛЬДИ́СТЫЙ,** -ая, -ое боҙло, боҙ менән ҡапланған

**ЛЬНО…** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "етен" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **льнокомба́йн** етен комбайны

**ЛЬНОВО́Д** *м* етенсе, етен үҫтереүсе (*белгес*)

**ЛЬНОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **льново́дческий**

**ЛЬНОВО́ДСТВО** *с* етенселек, етен үҫтереү; **развива́ть льново́дство** етенселек тармағын үҫтереү

**ЛЬНОВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое етенселек …ы; **льново́дческое хозя́йство** етенселек хужалығы

**ЛЬНОКОМБИНА́Т** *м* етен комбинаты

**ЛЬНОМЯ́ЛКА** *ж* талҡы, етен талҡыуысы

**ЛЬНОПРЯДИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое етен иләү …ы; **льнопряди́льная фа́брика** етен иләү фабрикаһы

**ЛЬНОТЕРЕБИ́ЛКА** *ж* етен йолҡҡос, етен йолҡоу машинаһы

**ЛЬНОТРЕПА́ЛКА** *ж* талҡы

**ЛЬНУТЬ** *несов. к кому-чему* һыйыныу, һырығыу, һырышыу; **льнуть ко взро́слым** ололарға һырығыу

**ЛЬНЯ́НКА** *ж* етен үлән, бесәй тырнағы

**ЛЬНЯНО́Й,** -ая, -ое **1.** етен, етен …ы; **льняно́е ма́сло** етен майы; **льняно́е по́ле** етен баҫыуы; **льняно́е пла́тье** етен күлдәк **2.** етен төҫлө, асыҡ һары (*сәстәргә ҡарата*); **льняны́е во́лосы** етен сәс

**ЛЬСТЕЦ** *м* ҡуштан, ялағай, ярамһаҡ

**ЛЬСТИТЬ** *несов.* **1.** *кому* и *без доп.* (*лицемерно хвалить, с корыстной целью*) ялағайланыу, ярамһаҡланыу, яҡшатланыу, ҡуштанланыу **2.** *1 и 2 л. не употр. кому-чему* (*доставлять удовлетворение*) күңелен күтәреү, ҡыуандырыу, шатландырыу; **мне льстит его́ внима́ние** уның иғтибары мине шатландыра ♦ **льстить себя́ наде́ждой** *книжн.* үҙеңде өмөт менән рухландырыу

**ЛЮБВЕОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күп кешене яратыусан (һөйөүсән), ныҡ һөйөүсән, мөхәббәтҡә (хискә) бай

**ЛЮБЕ́ЗНИЧАТЬ** *несов. с кем*; *разг.* илгәҙәкләнеү, яғымлы (татлы) һүҙҙәр әйтешеү

**ЛЮБЕ́ЗНОСТЬ** *ж* **1.** (*свойство*) асыҡ йөҙлөлөк, илгәҙәклек **2.** (*комплимент*) яғымлы, йылы һүҙ, маҡтау һүҙе; **говори́ть любе́зности** яғымлы (маҡтау) һүҙҙәре әйтеү **3.** (*одолжение*) илтифат, хөрмәт; **оказа́ть любе́зность** илтифат күрһәтеү, хөрмәт итеү

**ЛЮБЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*учтивый*) илгәҙәк, кеселекле, түбәнселекле, асыҡ йөҙлө (алсаҡ); **любе́зный челове́к** алсаҡ кеше **2.** *уст.* (*милый, дорогой*) хөрмәтле, ҡәҙерле **3.** *сущ.* **любе́зный** *м* и **любе́зная** *ж*; *уст.* (*в обращении*) ҡәҙерлем, һөйөклөм, хөрмәтлем ♦ **бу́дьте любе́зны** рәхим итеп, зинһар

**ЛЮБИ́МЕЦ** *м* и **ЛЮБИ́МИЦА** *ж* иркә, яратҡан (һөйгән, һөйөклө) кеше; **о́бщий люби́мец** бөтәһе лә яратҡан кеше

**ЛЮБИ́МЧИК** *м*; *разг.* яратҡан, һөйгән (һөйөклө) кеше

**ЛЮБИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөйгән, яратҡан, һөйөклө; **люби́мая же́нщина** яратҡан ҡатын; **лю-**

**би́мый цвет** яраткан төҫ **2.** *в знач. сущ.* **люби́мый** *м* и **люби́мая** *ж* һөйөклөм

**ЛЮБИ́ТЕЛЬ** *м* и **ЛЮБИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* **1.** *чего* и *с неопр.* яратыусы, һөйөүсе; **люби́тель му́зыки** музыка яратыусы **2.** (*не профессионал*) һәүәҫкәр; **фото́граф-люби́тель** һәүәҫкәр фотограф

**ЛЮБИ́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое һәүәҫкәр ...ы; **люби́тельский спекта́кль** һәүәҫкәр спектакль

**ЛЮБИ́ТЬ** *несов. кого-что*; *в разн. знач.* һөйөү, яратыу; **люби́ть Ро́дину** Тыуған илде һөйөү; **он лю́бит рыба́чить** ул балыкҡа йөрөргә ярата; **цветы́ лю́бят во́ду** сәскәләр һыу ярата; **си́льно люби́ть сы́на** улын нык (үлеп) яратыу

**ЛЮ́БО** *в знач. сказ., безл., с неопр.*; *разг.* күңелле, һокланғыс; **на них лю́бо смотре́ть** уларға ҡарау һокланғыс ♦ **лю́бо-до́рого** бик күңелле

**ЛЮБОВА́ТЬСЯ** *несов. кем-чем* и (*разг.*) *на кого-что* **1.** (*рассматривать*) һокланыу, ҡыҙығыу, һокланып яратып (ҡыҙығып) ҡарау; **любова́ться восхо́дом со́лнца** ҡояш сығыуын һокланып ҡарап тороу **2.** (*испытывать удовлетворение*) ҡарап һөйөнөү (ҡыуаныу)

**ЛЮБО́ВНИК** *м* һөйәр; **любо́вница** *ж* һөйәркә

**ЛЮБО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғишыҡ ...ы, мөхәббәт ...ы; **любо́вное письмо́** ғишыҡ хаты **2.** (*заботливый, бережный*) ихлас, яратып (һөйөп) эшләнгән (әйтелгән); **любо́вное отноше́ние к де́лу** эшкә ихлас ҡарау **3.** *уст.* мөхәббәт ...ы, һөйҙөргөс, һөйҙөртә торған; **любо́вный напи́ток** мөхәббәт эсемлеге

**ЛЮБО́ВЬ** *ж* **1.** (*привязанность*) яратыу, һөйөү; **любо́вь к роди́телям** ата-әсәгә һөйөү **2.** (*влечение*) мөхәббәт, ғишыҡ; **чи́стая любо́вь** саф мөхәббәт; **ого́нь любви́** мөхәббәт уты **3.** (*интерес*) яратыу, мауығыу; **любо́вь к иску́сству** сәнғәтте яратыу; **любо́вь к спо́рту** спорт менән мауығыу

**ЛЮБОЗНА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, белергә ынтылыш

**ЛЮБОЗНА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡһыныусан, белемгә ынтылыусан; **любозна́тельный учени́к** ҡыҙыҡһыныусан уҡыусы

**ЛЮБО́Й,** -ая, -ое **1.** (*всякий, каждый*) теләгән бер, теләһә ниндәй (ҡайһы); **в любо́й час** теләһә ҡайһы ваҡытта **2.** *в знач. сущ.* **любо́й** *м*, **люба́я** *ж*, **любо́е** *с* теләһә ҡайһы, теләһә кем; **любо́й из вас** теләһә ҡайһығыҙ ♦ **любо́й цено́й** нисек кенә булһа ла, хаҡына тормай

**ЛЮБОПЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙыҡһыныусан; **любопы́тный челове́к** ҡыҙыҡһыныусан кеше **2.** (*интересный*) ҡыҙыҡлы, ҡыҙыҡ, мәрәкә; **любопы́тный слу́чай** ҡыҙыҡ хәл (ваҡиға) **3.** *в знач. сущ.* **любопы́тный** *м* и **любопы́тная** *ж* ҡыҙыҡһыныусы (*кәрәккән-кәрәкмәгәнгә, урынһыҙ*)

**ЛЮБОПЫ́ТСТВО** *с* ҡыҙыҡһыныу, белергә тырышыу; **прояви́ть любопы́тство** ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү

**ЛЮБОПЫ́ТСТВОВАТЬ** *несов.* ҡыҙыҡһыныу, белергә тырышыу

**ЛЮ́БЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **люби́ть 2.** *прил.* яратыусы, һөйөүсе, мөхәббәт (ғишыҡ) тотоусы; **лю́бящая мать** яратҡан әсә

**ЛЮД** *м собир.*; *разг.* халыҡ, халыҡ төркөмө; **рабо́чий люд** эшсе халыҡ

**ЛЮ́ДИ** *мн.* (*ед.* **челове́к** *м*) **1.** кешеләр, халыҡ; **лю́ди иску́сства** сәнғәт кешеләре; **рабо́тать с людьми́** халыҡ менән эшләү (эш итеү); **молоды́е лю́ди** йәштәр, егеттәр; **ста́рые лю́ди** ҡарттар, ҡарт кешеләр **2.** *уст.* (*прислуга*) аҫрауҙар, ялсылар, хеҙмәтселәр ♦ **вы́йти в лю́ди** кеше (үҙ аллы) булыу; **на лю́дях** *разг.* кеше алдында (ҡулында)

**ЛЮ́ДНО** *в знач. сказ., безл.* кеше күп (булыу); **здесь о́чень лю́дно** бында кеше бик күп

**ЛЮ́ДНЫЙ,** -ая, -ое кеше күп, халыҡ күп булған; **лю́дная у́лица** кеше күп урам

**ЛЮДОЕ́Д** *м* кеше ашаусы

**ЛЮДСКО́Й,** -ая, -ое **1.** кешеләр ...ы; **род людско́й** кешеләр тоҡомо **2.** *в знач. сущ.* **людска́я** *ж*; *уст.* хеҙмәтселәр (ялсылар) өйө

**ЛЮК** *м* люк; **пройти́ че́рез люк** люк аша үтеү

**ЛЮКС I** *м*; *физ.* люкс (*яҡтыртылыу дәрәжәһен үлсәү берәмеге*)

**ЛЮКС II** *прил. неизм.* люкс (*яҡшы йыһазландырылған ҡунаҡхана һ.б.*)

**ЛЮ́ЛЬКА** *ж* сәңгелдәк, бишек; **кача́ть лю́льку** сәңгелдәк бәүетеү

**ЛЮ́МЕН** *м*; *физ.* люмен (*яҡтылыҡ дәрәжәһен үлсәү берәмеге*)

**ЛЮМИНЕСЦЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* люминесцент; **люминесце́нтная ла́мпа** люминесцент лампа

**ЛЮМИНЕСЦЕ́НЦИЯ** *ж*; *физ.* люминесценция (*газдарҙың электр тәьҫирендә балҡыу, нурланыу күренеше*)

**ЛЮ́МПЕН-ПРОЛЕТАРИА́Т** *м* люмпен-пролетариат (*синфи йөҙөн юғалтҡан, тарҡалған түбән ҡатлам*)

**ЛЮПИ́Н** *м* люпин, әсе борсаҡ (*ҡуҙаҡлы үлән*)

**ЛЮ́СТРА** *ж* аҫылмалы шәмдәл, люстра

**ЛЮТЕРА́НИН** *м* и **ЛЮТЕРА́НКА** *ж*; *рел.* лютеран

**ЛЮТЕРА́НСКИЙ,** -ая, -ое лютеран, лютеранлыҡ ...ы

**ЛЮТЕРА́НСТВО** *с* лютеранлыҡ (*христиан динендә Лютер нигеҙ һалған протестант йүнәлеше*)

**ЛЮ́ТИК** *м* лютик; **лю́тик ядови́тый** ағыулы лютик; **лю́тик е́дкий** зәһәр лютик

**ЛЮ́ТИКОВЫЕ** *мн.*; *бот.* лютик һымаҡтар

**ЛЮ́ТНЯ** *ж*; *муз.* лютня (*ҡыллы музыка ҡоралы*)

**ЛЮ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыртҡыс, уҫал, ҡанһыҙ, яуыз; **лю́тый зверь** йыртҡыс йәнлек; **лю́тый враг** яуыз дошман **2.** *перен.* бик ҡаты, әсе, зәһәр, үтә (бик) көслө; **лю́тый моро́з** бик ҡаты һыуыҡ; **лю́тая не́нависть** бик көслө нәфрәт

**ЛЮЦЕ́РНА** *ж* люцерна (*борсаҡ һымаҡ үҫемлек*)

**ЛЯ** *с нескл.*; *муз.* ля (*музыка гаммаһының алтынсы нотаһы*)

**ЛЯГА́ТЬ** *несов. кого*; *прям.*, *перен.* тибеү

**ЛЯГА́ТЬСЯ** *несов.* тибешеү

**ЛЯГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* тибеү, тибеп ебәреү

**ЛЯГУША́ТНИК** *м*; *разг.* лягушатник (*балалар өсөн һыу инеү урыны, һай урын*)

**ЛЯГУША́ЧИЙ,** -ья, -ье баҡа ...ы, телмәрйен ...ы; **лягуша́чья икра́** баҡа (тәлмәрйен) ыуылдырығы

**ЛЯГУ́ШЕЧНИК** *м* баҡа үләне, баҡа япрағы, баҡа ебәге

**ЛЯГУ́ШКА** *ж* баҡа, тәлмәрйен; **травяна́я лягу́шка** һоро тәлмәрйен (баҡа) (*күберәк ҡоро ерҙә йәшәй*)

**ЛЯГУШО́НОК** *м* тәлмәрйен (баҡа) балаһы

**ЛЯ́ЖКА** *ж*; *разг.* бот ите, таҡым

**ЛЯЗГ** *м* сыңлау; (*о металлических предметах*) зыңлау, сың-сың (зың-зың) итеү, сыңғырау; **лязг цепе́й** сынйыр сыңлауы

**ЛЯ́ЗГАТЬ** *несов.* **1.** *чем* сыҡылдау; **ля́згать но́жницами** ҡайсы сыҡылдатыу **2.** шыҡылдатыу, шығырлатыу; **ля́згать зуба́ми** теш шығырлатыу

**ЛЯ́МКА** *ж* яҫы бау, ҡайыш, ләмкә; **приши́ть ля́мку** ләмкә тағыу ♦ **тяну́ть ля́мку** егелеү, эштең ауырын алып барыу

**ЛЯ́ПИС** *м*; *мед.* ляпис (*көмөш нитраты*)

**ЛЯ́ПСУС** *м* (тупаҫ) хата, ҙур яңылышлыҡ

**ЛЯ́СЫ: ля́сы точи́ть** *прост.* ләстит һатыу, юҡбар һөйләү

# М

**МАВЗОЛЕ́Й** *м* мавзолей; **мавзоле́й В.И.Ле́нина** В.И.Ленин мавзолейы

**МАВРИТА́НСКИЙ,** -ая, -ое мавр ...ы, мавритан ...ы, Мавритания ...ы; **маврита́нский стиль в архитекту́ре** архитектурала Мавритания стиле

**МАВРИТА́НЦЫ** *мн.* мавритандар, Мавритания халҡы // *ед.* **маврита́нец** и **мавр** *м* мавритан ир-аты, мавр ир-аты; **маврита́нка** *ж* мавритан ҡатын-ҡыҙы, мавр ҡатын-ҡыҙы

**МА́ВРЫ** *мн.* **1.** маврҙар (*Төньяҡ-көнбайыш Африкала* (*Мавретанияла*) *йәшәгән боронғо ҡәбилә*) // *ед.* **мавр** *м* мавр ир-аты; **маврита́нка** *ж* мавр ҡатын-ҡыҙы **2.** *см.* **маврита́нцы**

**МАГ** *м* сихырсы, тылсымсы, күрәҙәсе ♦ **маг и волше́бник** *шутл.* оҫта (булдыҡлы) кеше

**МАГАЗИ́Н** *м*; *в разн. знач.* магазин; **продукто́вый магази́н** аҙыҡ-түлек магазины; **магази́н сопротивле́ний** *тех.* ҡаршылыҡтар магазины; **магази́н винто́вки** винтовка магазины; **у́лей с магази́ном** магазинлы умарта

**МАГАЗИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** магазин ...ы; **магази́нный инвента́рь** магазин инвентары **2.** магазинлы; **магази́нное ору́жие** магазинлы ҡорал

**МАГАРА́ДЖА** *м* магараджа, өлкән раджа (*Һиндостанда кенәздәрҙең иң юғары титулы һәм шул титулдағы кеше*)

**МАГАРЫ́Ч** *м*; *прост.* мәгәрис; **с тебя́ магары́ч** һинән мәгәрис

**МАГИ́СТР** *м* магистр (**1.** *ғилми дәрәжә һәм шундай дәрәжә алған кеше* **2.** *тар. Урта быуатта монахтар йәки рыцарҙар башлығының титулы һәм шул титулдағы кеше*)

**МАГИСТРА́ЛЬ** *ж* магистраль; **железнодоро́жная магистра́ль** тимер юл магистрале; **широ́кая магистра́ль го́рода** ҡаланың киң магистрале; **га́зовая магистра́ль** газ магистрале

**МАГИСТРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** магистраль, төп, мөһим, **магистра́льный ка́бель** магистраль кабель; **магистра́льное направле́ние** төп йүнәлеш; **магистра́льная те́ма** төп (мөһим) тема **2.** иң оҙон, киң, магистраль; **магистра́льная у́лица** иң оҙон, киң урам

**МАГИСТРА́Т** *м* магистрат (*ҡайһы бер илдәрҙә ҡала идаралығы, шул идаралыҡ урынлашҡан йорт*)

**МАГИСТРА́ТСКИЙ,** -ая, -ое магистрат ...ы; **магистра́тское управле́ние** магистрат идараһы

**МАГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** магия ...ы, сихырлау ...ы; **маги́ческие приёмы** магия алымдары **2.** *перен.* сихырлы, тылсымлы, сихырланғандай (сиктән тыш) көслө, ғәжәп; **маги́ческое сло́во** тылсымлы һүҙ ♦ **маги́ческий круг** *см.* **заколдо́ванный**

**МА́ГИЯ** *ж*; *прям.*, *перен.* магия, сихыр, тылсым; **ма́гия слов** һүҙҙәр тылсымы; ♦ **чёрная ма́гия** сихыр (*ҡара көстәр ярҙамында*)

**МА́ГМА** *ж*; *геол.* магма (*Ер шарының ҡаты ҡатламы аҫтындағы ҡайнар шыйыҡ масса*)

**МАГМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *геол.* **1.** магма ...ы; **магмати́ческий оча́г** магма сығанағы **2.** магмалы; **магмати́ческие го́рные поро́ды** магмалы тау тоҡомдары

**МАГНА́Т** *м* магнат; **по́льские магна́ты** Польша магнаттары; **фина́нсовый магна́т** финанс магнаты

**МАГНЕЗИ́Т** *м*; *мин.* магнезит

**МАГНЕ́ЗИЯ** *ж* магнезия ♦ **жжёная магне́зия** яндырылған магнезия (*магний окисы*); **бе́лая магне́зия** аҡ магнезия (*магний тоҙо*)

**МАГНЕТИ́ЗМ** *м* магнетизм (**1.** *магнит үҙенсәлеге* **2.** *магнит күренештәре тураһындағы тәғлимәт*); **явле́ния магнети́зма** магнетизм күренештәре; **курс магнети́зма** магнетизм курсы

**МАГНЕТИ́Т** *м*; *мин.* магнетит

**МАГНЕ́ТО** *с нескл.* магнето (*эске яныулы двигателдәрҙә осҡон барлыҡҡа килтерә торған электромагнитлы прибор*); **пусково́е магне́то** эшләтә башлаусы магнето

**МА́ГНИЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** магний ...ы; **ма́гниевая вспы́шка** магний уты **2.** магнийлы; **ма́гниевые ру́ды** магнийлы мәғдәндәр

**МА́ГНИЙ** *м* магний (*химик элемент, металл*); **о́кись ма́гния** магний окисы

**МАГНИ́Т** *м* магнит; **иску́сственный магни́т** яһалма магнит

**МАГНИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** магнит ...ы; **магни́тные сво́йства** магнит үҙсәнлектәре **2.** магнитлы; **магни́тный железня́к** магнитлы тимер мәғдәне ♦ **магни́тная анома́лия** *физ.* магнит аномалияһы; **магни́тная бу́ря** *физ.* магнит бураны; **магни́тная ле́нта** магнит таҫмаһы; **магни́тный меридиа́н** *физ.* магнит меридианы; **магни́тное по́ле** *физ.* магнит ҡыры; **магни́тный по́люс Земли́** *физ.* Ерҙең магнит полюсы; **магни́тный эква́тор** *физ.* магнит экваторы

**МАГНИТО́ЛА** *ж* магнитола (*радиоалғыс менән магнитофоны бергә эшләнгән аудиоаппарат*); **включи́ть магнито́лу** магнитоланы эшләтеп ебәреү

**МАГНИТОФО́Н** *м* магнитофон; **за́пись пе́сен на магнитофо́н** йырҙарҙы магнитофонға яҙып алыу

**МАГНИТОФО́ННЫЙ,** -ая, -ое магнитофон ...ы; **магнитофо́нная кассе́та** магнитофон кассетаһы

**МАГНО́ЛИЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** магнолия ...ы; **магно́лиевый за́пах** магнолия еҫе **2.** *в знач. сущ.* **магно́лиевые** *мн.*; *бот.* магнолия һымаҡтар (*хуш еҫле, эре аҡ сәскәле ағас йәки ҡыуаҡ*)

**МАГНО́ЛИЯ** *ж* магнолия ...ы (*хуш еҫле, эре аҡ сәскәле ағас йәки ҡыуаҡ*); **цветы́ магно́лии** магнолия сәскәләре

**МАГОМЕТА́НИН** *м* и **МАГОМЕТАНКА** *ж* *см.* **мусульма́нин**

**МАГОМЕТА́НСКИЙ,** -ая, -ое *см.* **мусульма́нский**

**МАГОМЕТА́НСТВО** *с см.* **мусульма́нство**

**МАДА́М** *ж нескл.* ханым, мадам

**МАДЕМУАЗЕ́ЛЬ** *ж* туташ, мадемуазель

**МАДЕ́РА** *ж* мадера (*шарап төрө*)

**МАДО́ННА** *ж* Мадонна (*католиктарҙа: Алла инәһе (Алиһә) һәм уның һүрәте, һыны*); **ста́туя Мадо́нны** Мадонна һыны

**МАДРИГА́Л** *м*; *лит.* мадригал (*ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙға арналған ҡыҫҡа лирик шиғыр*); **чита́ть мадрига́лы** мадригалдар уҡыу

**МАДЬЯ́РСКИЙ,** -ая, -ое мадьяр ...ы; **мадья́рский язы́к** мадьяр теле

**МАДЬЯ́РЫ** *мн.* мадьярҙар, мадьяр халҡы // *ед.* **мадья́р** *м* мадьяр ир-аты; **мадья́рка** *ж* мадьяр ҡатын-ҡыҙы

**МАЁВКА** *ж* маёвка (*революцияға тиклем Рәсәйҙә эшселәрҙең 1 майҙа үткәрелә торған йәшерен йыйылышы*)

**МАЖО́Р** *м* **1.** *муз.* мажор **2.** *перен., разг.* көр (шат, күтәренке) күңел; **быть в мажо́ре** күтәренке күңелле булыу

**МАЖОРИТА́РНЫЙ,** -ая, -ое мажоритар (*күпселек тауышты алыуға ҡоролған*) ♦ **мажорита́рная систе́ма** мажоритар система (*законға ярашлы күпселек тауыш алған кандидаттың йәки кандидаттар исемлегенең вәкәләтле дәүләт органына һайлау системаһы*)

**МАЖО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *муз.* мажор; **мажо́рные зву́ки** мажор тауыштар **2.** *перен.* көр, шат, күтәренке; **мажо́рное настрое́ние** күтәренке күңел

**МА́ЗАНКА** *ж* балсыҡ (саман) өй

**МА́ЗАТЬ** *несов.* **1.** *что* һылау, яғыу, һөртөү, майлау; **ма́зать сте́ны ха́ты** өйҙөң стенаһын һылау; **ма́зать хлеб ма́слом** икмәккә май яғыу; **ма́зать колёса** тәгәрмәстәрҙе майлау **2.** *кого-что*; *разг.* (*пачкать, грязнить*) бысратыу, буяу; **ма́зать ска́терть** ашъяулыҡты бысратыу **3.** *кого-что* и *без доп.*; *разг.* (*неумело, неискусно рисовать краской*) буяштырыу **4.** *прост.* (*делать промахи*) яҙа атыу, тейҙерә алмау

**МА́ЗАТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* һөртөү, һөртөнөү, биҙәнеү; **ма́заться кре́мом** кершән һөртөнөү **2.** (*пачкаться, грязниться*) бысраныу, буялыу; **бе́лое пла́тье бы́стро ма́жется** аҡ күлдәк тиҙ бысрана **3.** *разг.* (*пачкать при прикосновении*) йоғоу, сығыу; **стена́ ма́жется** стенаның буяуы сыға **4.** *страд. от* **ма́зать** 1

**МАЗИ́ЛА** *м* и *ж*; *прост., неодобр.* **1.** (*неряха, грязнуля*) бысраҡ, шаҡшы **2.** ебегән, булдыҡһыҙ (*ғәҙәттә, спортсыға ҡарата*)

**МАЗНИ́ЦА** *ж* дегет күнәге

**МАЗНУ́ТЬ** *сов.* **ма́зать** 1, 2, 4

**МАЗНЯ́** *ж*; *разг.* насар һүрәт, һәләтһеҙ эш

**МАЗО́К** *м* **1.** *жив.* буяу (төшөрөү, һалыу) алымы; **писа́ть карти́ну широ́кими мазка́ми** һүрәтте киң алымдар менән төшөрөү **2.** *мед.* мазок; **взять мазо́к** мазок алыу (*ауырыуҙы тикшереү өсөн*)

**МАЗУ́РКА** *ж*; *муз.* мазурка; **мазу́рка Шопе́на** Шопен мазуркаһы

**МАЗУ́Т** *м*; *тех.* мазут (*шыйыҡ яғыулыҡ*)

**МАЗУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое мазут ...ы; **мазу́тное пятно́** мазут табы

**МАЗЬ** *ж* **1.** (*лекарство*) мазь, май (*дарыу*) **2.** (*для смазки*) май; **колёсная мазь** тәгәрмәс майы ♦ **на мази́** *что-л.*; *прост. берәй нәмә* майланғандай (көйлө, яйлы) бара; **де́ло на мази́** эш майланғандай, көйлө

**МАЙ** *м* май, май айы ♦ **пра́здник Пе́рвого ма́я** Беренсе май байрамы

**МА́ЙКА** *ж* майка; **спорти́вная ма́йка** спорт майкаһы

**МА́ЙНА I** *ж* йылыу, ҡаран

**МА́ЙНА II** *межд.* майна (*йөктө "төшөр!", "түбәнгә!" тигән команда*; *киреһе "вира"*)

**МАЙО́ЛИКА** *ж* майолика (*биҙәп эшләнгән балсыҡ һауыт-һаба һ.б.*)

**МАЙОНЕ́З** *м*; *кул.* майонез; **яйцо́ под майоне́зом** майонез һалынған йомортҡа

**МАЙО́Р** *м*; *воен.* майор; **пого́ны майо́ра** майор погондары

**МАЙОРА́Т** *м* майорат (*ҡайһы бер илдәрҙә мираҫ булып ҡала торған ер, шулай уҡ ерҙе мираҫ итеп ҡалдырыу тәртибе*)

**МА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое май ...ы; **ма́йское со́лнце** май ҡояшы ♦ **майский жук** *зоол.* май ҡуңыҙы

**МАК** *м* мәк (*үҫемлеге һәм орлоғо*); **цветы́ ма́ка** мәк сәскәһе

**МАКА́КА** *ж* макака (*маймыл төрө*)

**МАКАРО́ННИК** *м* макаронник (*макарондан ҡыҙҙырып бешерелгән ашамлыҡ*)

**МАКАРО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** макарон ...ы; **макаро́нная фа́брика** макарон фабрикаһы **2.** макаронлы; **макаро́нная запека́нка** макаронлы запеканка

**МАКАРО́НЫ** *только мн.* макарон; **купи́ть макаро́ны** макарон һатып алыу

**МАКА́ТЬ** *несов. что* маныу, мансыу; **мака́ть перо́ в черни́ла** пероны ҡараға маныу

**МАКЕДО́НСКИЙ,** -ая, -ое македон ...ы, Македония...ы; **македо́нский язы́к** македон теле

**МАКЕДО́НЦЫ** *мн.* македондар, македон халҡы // *ед.* **македо́нец** *м* македон ир-аты; **македо́нка** *ж* македон ҡатын-ҡыҙы

**МАКЕ́Т** *м* макет; **маке́т па́рка** парк макеты; **маке́т кни́ги** китап макеты

**МАКЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое макет ...ы; **маке́тная мастерска́я** макет оҫтаханаһы

**МА́КЛЕР** *м* маклер, аралашсы; **услу́ги ма́клера** аралашсы ярҙамы

**МА́КЛЕРСТВО** *с* маклерлыҡ (аралашлыҡ) кәсебе; **зараба́тывать де́ньги ма́клерством** аралашлыҡ кәсебе менән аҡса эшләү (табыу)

**МА́КЛЕРСТВОВАТЬ** *несов.* маклерлыҡ (аралашлыҡ) итеү

**МАКНУ́ТЬ** *сов. см.* **мака́ть**

**МА́КОВ: как ма́ков цвет** мәк сәскәһе кеүек, мәктең ал сәскәһе төҫлө; **лицо́ твоё как ма́ков цвет** йөҙөң мәктең ал сәскәһе төҫлө

**МА́КОВКА** *ж* **1.** мәк башы **2.** (*купол церкви*) сиркәү көмбәҙе **3.** *разг. см.* **маку́шка**

**МА́КОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәк ...ы; **ма́ковое се́мя** мәк орлоғо **2.** мәкле; **ма́ковый пря́ник** мәкле перәник **3.** *в знач. сущ.* **ма́ковые** *мн.*; *бот.* мәк һымаҡтар ♦ **ма́ковой роси́нки в рот не брать**; **ма́ковой роси́нки во рту не́ было** ауыҙыма бер тәғәм ризыҡ та ҡапҡаным юҡ; ауыҙға бер тәғәм дә ҡапмау

**МАКРОКЛИ́МАТ** *м* макроклимат (*Ер шарының ҙур арауыҡтарына хас климат*)

**МАКРОКО́СМ** и **МАКРОКО́СМОС** *м*; *книжн.* донъя, йыһан

**МАКРОСКОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое макроскопик, ябай күҙгә күренерлек; **макроскопи́ческие проце́ссы** макроскопик процестар

**МАКСИ́М** *м*; *разг.* максим (*станоклы пулемёт төрө*)

**МАКСИМАЛИ́ЗМ** *м* максимализм (*реаль ысынбарлыҡ менән аҡланмаҫлыҡ ғәйәт ҙур талап*)

**МАКСИМАЛИ́СТ** *м* максималист, максимализм яҡлы (*кеше*)

**МАКСИМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое максималь, иң күп (ҙур, юғары); **максима́льное коли́чество** максималь һан, иң юғары иҫән

**МА́КСИМУМ** *м* **1.** максимум, иң күп; **ма́ксимум эне́ргии** күп көс **2.** *в знач. нареч.* иң күп (күбендә), күп тигәндә; **ма́ксимум две неде́ли** иң күбендә ике аҙна **3.** *в знач. неизм. прил.* максимум; **програ́мма-ма́ксимум** программа-максимум

**МАКУЛАТУ́РА** *ж*; *прям.*, *перен.* макулатура (**1.** *ташландыҡ китап, гәзит-журналдар, төрлө ҡағыҙҙар* **2.** *күсм. һай эстәлекле әҙәби әҫәр*); **сбор макулату́ры** макулатура йыйыу

**МАКУЛАТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое *прям.*, *перен.* макулатура ...ы; **макулату́рные отхо́ды** макулатура ҡалдыҡтары

**МАКУ́ШКА** *ж* **1.** түбә, баш; **маку́шка горы́** тау түбәһе; **маку́шка де́рева** ағас башы **2.** түбә; **ша́пка на маку́шке** бүрек түбәлә генә тора ♦ **у́шки на маку́шке** *у кого* һаҡ ҡолаҡ

**МАЛА́ГА** *ж* малага (*шарап төрө*)

**МАЛА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое малай ...ы Малайя ...ы; **мала́йский язы́к** малай теле

**МАЛА́ЙЦЫ** *мн.* малайялылар, малай халҡы // *ед.* **мала́ец** *м* малай ир-аты; **мала́йка** *ж* малай ҡатын-ҡыҙы

**МАЛАХА́Й** *м* ҡолаҡсын бүрек

**МАЛАХИ́Т** *м*; *мин.* малахит

**МАЛАХИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** малахит ...ы; **малахи́товые месторожде́ния** малахит ятҡылыҡтары **2.** малахит; **малахи́товая ва́за** малахит ваза **3.** (*о цвете*) асыҡ йәшел, малахит төҫөндә; **малахи́товое пла́тье** асыҡ йәшел төҫтәге күлдәк

**МАЛЕВА́ТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.*; *разг.* арлы-бирле буяу

**МАЛЕ́ЙШИЙ,** -ая, -ее саҡ ҡына, аҙ ғына, бик аҙ (бәләкәй), иң аҙ (бәләкәй); **не име́ть ни мале́йшего поня́тия** саҡ ҡына ла күҙ алдына килтерә алмау; **не ощути́ть ни мале́йшего чу́вства стра́ха** аҙ ғына ла ҡурҡыу хисе тоймау

**МАЛЁК** *м*; *зоол.* йотҡолоҡ, селбәрә

**МА́ЛЕНЬКИЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* бәләкәй, бәләкәс; **ма́ленькая ко́мната** бәләкәй бүлмә; **челове́к ма́ленького ро́ста** бәләкәй буйлы кеше; **ма́ленький отря́д** бәләкәй отряд; **ма́ленькая неприя́тность** бәләкәй генә күңелһеҙлек; **ма́ленький челове́к** бәләкәй кеше; **ма́ленькие де́ти** бәләкәй балалар **2.** *в знач. сущ.* **ма́ленький** *м* и **ма́ленькая** *ж*; *разг.* бәләкәс, бәләкәй (*бала*); **ма́ленький запла́кал** бәләкәс илап ебәрҙе ♦ **ма́ленькая бу́ква** бәләкәй хәреф

**МАЛИ́НА** *ж* ҡурай еләге, әберсә; **садо́вая мали́на** баҡса ҡурай еләге; **лесна́я мали́на** урман әберсәһе; **собира́ть мали́ну** ҡурай еләге йыйыу

**МАЛИ́ННИК** *м* ҡурай еләклек, ҡурай еләге ҡыуаҡлығы, әберсәлек; **спря́таться в мали́ннике** ҡурай еләге ҡыуаҡлығына йәшенеү

**МАЛИ́НОВКА** *ж* ҡурай еләге (әберсә) турғайы

**МАЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡурай еләге ...ы; **мали́новый лист** ҡурай еләге япрағы; **мали́новое варе́нье** ҡурай еләге ҡайнатмаһы **2.** (*о цвете*) сағыу ал, һандал, ал ҡыҙыл; **мали́новый ба́рхат** ал ҡыҙыл бәрхәт ♦ **мали́новый звон** ҡыңғырауҙың яғымлы тауышы

**МА́ЛО** *нареч.*; *в разн. знач.* аҙ, әҙ; **ма́ло сде́лано** әҙ эшләнгән; **мне э́того ма́ло** был ғына миңә аҙ; **ма́ло ли у нас хоро́ших люде́й** беҙҙә яҡшы кешеләр әҙме ни ♦ **ма́ло ли что** булмағайы, булһа һуң; **ма́ло того́** *в знач. вводн. сл.* ул ғына ла түгел, ул ғына етмәгән

**МАЛО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "аҙ", "әҙ", "бәләкәй" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **малова́жный** аҙ әһәмиәтле; **малоисследо́ванный** әҙ тикшерелгән

**МАЛОВА́ТО** *нареч.*; *разг.* аҙыраҡ, әҙерәк, етеңкерәмәй, бәләкәйерәк; **сде́лано малова́то** әҙерәк эшләнгән; **возмо́жностей малова́то** мөмкинлектәр аҙыраҡ

**МАЛОВЕ́Р** *м* ышанып етмәүсе, икеләнеүсе (*кеше*)

**МАЛОВЕРОЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое шикле, икеле; **маловероя́тные слу́хи** икеле хәбәрҙәр

**МАЛОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙ һыулы; **малово́дная река́** аҙ һыулы йылға **2.** аҙ һуғарылған; **малово́дная степь** аҙ һуғарылған дала

**МАЛОВО́ДЬЕ** *с* **1.** (*низкий уровень воды в водоёмах*) һыу аҙлыҡ, аҙ һыулылыҡ, һай булыу; **малово́дье о́зера** күлдә һыу аҙлыҡ; күлдең һай булыуы **2.** һыу етешмәү; **борьба́ с малово́дьем** һыу етешмәүгә ҡаршы көрәш

**МАЛОВРАЗУМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аҙ аңлайышлы, бик (үк) асыҡ түгел (булмаған); **маловразуми́тельный отве́т** аҙ аңлайышлы яуап

**МАЛОГАБАРИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй габаритлы, ҙур булмаған; **малогабари́тный стано́к** бәләкәй габаритлы станок

**МАЛОГОВОРЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее асыҡлыҡ индермәгән, аҙ әһәмиәтле, аҙ һүҙле; **малоговоря́щий факт** әһәмиәтһеҙ факт

**МАЛОГРА́МОТНОСТЬ** *ж* аҙ белемлелек, наҙанлыҡ; **ликвида́ция малогра́мотности** наҙанлыҡты бөтөрөү

**МАЛОГРА́МОТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙ белемле, белеме етеңкерәмәгән; **малогра́мотный челове́к** аҙ белемле кеше **2.** (*выполненный без достаточных знаний*) насар эшләнгән, насар сифатлы; **малогра́мотная статья́** насар яҙылған мәҡәлә

**МАЛОДО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое аҙ һөтлө, аҙ һөт биргән; **малодо́йная коро́ва** аҙ һөт биргән һыйыр

**МАЛОДУ́ШЕСТВОВАТЬ** *несов.* төшөнкөлөккә бирелеү, рух төшөү, юғалып (ҡурҡып) ҡалыу; **малоду́шествовать в мину́ты опа́сности** ҡурҡыныс минуттарҙа юғалып ҡалыу

**МАЛОДУ́ШИЕ** *с* ҡыйыуһыҙлыҡ, ҡурҡаҡлыҡ; **проявля́ть малоду́шие** ҡурҡаҡлыҡ күрһәтеү

**МАЛОДУ́ШНИЧАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **малоду́шествовать**

**МАЛОДУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое ихтыярһыҙ, йомшаҡ, ҡыйыуһыҙ, баҙау; **малоду́шный челове́к** ҡыйыуһыҙ кеше; **малоду́шный посту́пок** ихтыярһыҙ ҡылыҡ

**МАЛОЗАМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙ ғына күренгән, әҙ генә беленгән, күренер-күренмәҫ; **малозаме́тная чёрточка** күренер-күренмәҫ һыҙыҡса **2.** айырылып (күҙгә ташланып) тормаған, танылмаған; **малозаме́тный челове́к** бер яғы менән дә айырылып тормаған кеше

**МАЛОЗЕМЕ́ЛЬЕ** *с* и **МАЛОЗЕМЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* әҙ ерлелек, ер әҙлек

**МАЛОЗЕМЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әҙ ерле (ере әҙ) булған; **малоземе́льные крестья́не** әҙ ерле крәҫтиәндәр

**МАЛОЗНАКО́МЫЙ,** -ая, -ое бик үк таныш булмаған; **малознако́мая ме́стность** бик үк таныш булмаған ер

**МАЛОЗНАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое и **МАЛОЗНА́ЧАЩИЙ,** -ая, -ее әҙ әһәмиәтле, артыҡ (бик үк) әһәмиәте булмаған, әһәмиәте бәләкәй (әҙ); **малозначи́тельный факт** артыҡ әһәмиәте булмаған факт; **малозначи́тельный вопро́с** әһәмиәте бәләкәй (ваҡ) мәсьәлә

**МАЛОИЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое артыҡ билдәле булмаған, танылыу алмаған, аҙ билдәле (танылған); **малоизве́стная кни́га** артыҡ билдәле булмаған китап; **малоизве́стный поэ́т** танылыу алмаған шағир

**МАЛОИЗУ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое аҙ өйрәнелгән (тикшерелгән); **малоизу́ченный райо́н** аҙ өй-



18 зак. 2.0084.05

рәнелгән район; **малоизу́ченная рабо́та** аҙ тикшерелгән эш

**МАЛОИМУ́ЩИЙ,** -ая, -ее аҙ милекле, фәҡир, ярлы; **малоиму́щие сло́и** ярлы ҡатламдар

**МАЛОИНТЕРЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое (артыҡ) ҡыҙығы булмаған, ҡыҙығы аҙ; **малоинтере́сная кни́га** ҡыҙығы булмаған китап

**МАЛОКАЛИ́БЕРНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **мелкокали́берный**

**МАЛОКАЛОРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое аҙ калориялы, туҡлыҡлы булмаған; **малокалори́йное то́пливо** аҙ калориялы яғыулыҡ; **малокалори́йная пи́ща** аҙ калориялы аҙыҡ

**МАЛОКВАЛИФИЦИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое түбән квалификациялы; **малоквалифици́рованный рабо́тник** түбән квалификациялы хеҙмәткәр

**МАЛОКРО́ВИЕ** *с* аҙ ҡанлылыҡ; **страда́ть от малокро́вия** аҙ ҡанлылыҡ менән интегеү

**МАЛОКРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое аҙ ҡанлы, ҡан аҙлыҡ менән интеккән; **малокро́вный ребёнок** аҙ ҡанлыҡ менән интеккән бала

**МАЛОКУЛЬТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое артта ҡалған, мәҙәниәте түбән, тәрбиәһеҙ; **малокульту́рный челове́к** мәҙәниәте түбән кеше

**МАЛОЛЕ́ТКА** *м* и *ж* *см.* **малоле́ток**

**МАЛОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** бәләкәй, бәләкәс, сабый; **малоле́тние де́ти** бәләкәй (сабый) балалар **2.** *в знач. сущ.* **малоле́тний** *м* и **малоле́тняя** *ж* бәләкәй бала

**МАЛОЛЕ́ТОК** *м* и **МАЛОЛЕ́ТКА** *м* и *ж*; *разг.* бәләкәс (сабый) бала

**МАЛОЛЕ́ТСТВО** *с*; *разг.* сабый (бәләкәй) саҡ, бала саҡ

**МАЛОЛИТРА́ЖКА** *ж*; *разг.* малолитражка (*бәләкәй литражлы еңел автомобиль*)

**МАЛОЛИТРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй, аҙ һыйҙырышлы; **малолитра́жный бак** әҙ һыйҙырышлы бак

**МАЛОЛЮ́ДНЫЙ,** -ая, -ое аҙ халыҡлы, халҡы аҙ; **малолю́дный райо́н** аҙ халыҡлы район

**МА́ЛО-МА́ЛЬСКИ** *нареч.*; *разг.* аҙ-маҙ ғына, аҙ ғына, саҡ ҡына; **ма́ло-ма́льски похо́ж на отца́** саҡ ҡына атаһына оҡшаған

**МАЛОМА́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* аҙ ғына, бәләкәй генә; **прояви́ть малома́льское уваже́ние** аҙ ғына ихтирам күрһәтеү

**МАЛОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй, аҙ һыйышлы; **маломе́рная о́бувь** бәләкәй аяҡ кейеме; **маломе́рный сосу́д** аҙ һыйышлы һауыт

**МАЛОМЕТРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй метражлы; **малометра́жная кварти́ра** бәләкәй метражлы фатир

**МАЛОМО́ЩНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡеүәте (көсө) аҙ, ҡеүәтһеҙ; **маломо́щный дви́гатель** ҡеүәтһеҙ двигатель **2.** (*бедный*) ярлы, хәлһеҙ; **маломо́щное хозя́йство** ярлы хужалыҡ

**МАЛОНАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое аҙ ышаныслы, ышанысы аҙ булған; **малонадёжный челове́к** ышанысһыҙ кеше

**МАЛОНАСЕЛЁННЫЙ,** -ая, -ое халҡы аҙ, күп йәшәмәгән, аҙ халыҡлы; **малонаселённый край** аҙ халыҡлы яҡ, халыҡ күп йәшәмәгән төбәк

**МАЛОО́БЛАЧНЫЙ,** -ая, -ое аҙ болотло; **малоо́блачный день** аҙ болотло көн; **малоо́блачное не́бо** аҙ болотло күк йөҙө

**МАЛООБРАЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое аҙ уҡыған, аҙ белемле, белеме самалы; **малообразо́ванный челове́к** аҙ белемле кеше

**МАЛОО́ПЫТНЫЙ,** -ая, -ое аҙ тәжрибәле, тәжрибәһе етмәгән; **малоо́пытный специали́ст** тәжрибәһе етмәгән белгес

**МАЛОПОДВИ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙ хәрәкәтләнеүсән, ауыр (аҡрын) ҡуҙғалыусан, ауыр кәүҙәле, һүлпән; **малоподви́жный челове́к** ауыр ҡуҙғалыусан кеше **2.** (*о лице*) әҙ үҙгәреүсән; **малоподви́жное лицо́** әҙ үҙгәреүсән йөҙ

**МА́ЛО-ПОМА́ЛУ** *нареч.*; *разг.* әҙ-әҙләп, әкренләп; **ма́ло-пома́лу нача́ть ходи́ть** әкренләп йөрөй башлау

**МАЛОПОНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое аҙ аңлайышһыҙ, аңлашылып етмәгән; **малопоня́тная фра́за** аңлашылып етмәгән фраза

**МАЛОПРИ́БЫЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әҙ килемле (табышлы); **малопри́быльное предприя́тие** әҙ килемле (файҙа килтермәгән) предприятие

**МАЛОПРИГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое яраҡһыҙ тиерлек, бик үк яраҡлы булмаған; **малопригодная для посе́ва земля́** сәсеү өсөн яраҡһыҙ тиерлек ер

**МАЛОПРОДУКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое файҙаһы (һөҙөмтәһе) аҙ, аҙ һөҙөмтәле; **малопродукти́вный труд** аҙ һөҙөмтәле хеҙмәт

**МАЛОРАЗГОВО́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое аҙ һөйләшеүсән, һүҙгә һаран; **малоразгово́рчивый челове́к** аҙ һөйләшеүсән кеше

**МАЛОРО́СЛЫЙ,** -ая, -ое (*о людях и животных*) тәбәнәк, бәләкәй (ҡыҫҡа) буйлы, кәүҙәгә бәләкәй, тоҡор; (*о растениях*) ҡыҫҡа, тәпәш; **малоро́слый челове́к** ҡыҫҡа буйлы кеше; **малоро́слая берёза** тәпәш ҡайын

**МАЛОСЕМЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй (аҙ) ғаиләле; **малосеме́йные лю́ди** бәләкәй ғаиләле кешеләр

**МАЛОСОДЕРЖА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һай йөкмәткеле (эстәлекле), эстәлеге ярлы (һай); **малосодержа́тельная по́весть** һай эстәлекле повесть

**МАЛОСОЗНА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое түбән аңлы; **малосозна́тельный челове́к** түбән аңлы кеше

**МАЛОСО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое еңелсә тоҙланған, тоҙо әҙ; **малосо́льные огурцы́** еңелсә тоҙланған ҡыяр

**МА́ЛОСТЬ** *ж* **1.** *разг.* (*пустяк*) ваҡ-төйәк, ваҡ нәмә, юҡ-бар нәмә; **отвеча́ть за ка́ждую ма́лость** һәр юҡ-бар нәмә өсөн яуап биреү **2.** *в знач. нареч.*; *прост.* аҙыраҡ, саҡ ҡына, бер аҙ; **потерпи́ ма́лость** саҡ ҡына сабыр ит ♦ **са́мая ма́лость** аҙ ғына, саҡ ҡына

**МАЛОЧИ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙ һанлы, бәләкәй; **малочи́сленный отря́д** аҙ һанлы отряд **2.** һирәк була (осрай) торған; **малочи́сленные слу́чаи** һирәк осрай торған ваҡиғалар

**МА́ЛЫЙ I,** -ая, -ое **1.** бәләкәй, бәләкәс; **ма́лый разме́р** бәләкәй үлсәм; **ма́лый рост** бәләкәй буй; **ма́лые стра́ны** бәләкәй (ваҡ) илдәр; **ма́лый отря́д** бәләкәй отряд; **ма́лые лю́ди** бәләкәй кешеләр; **ма́лые де́ти** бәләкәй балалар **2.** *только кратк. ф.* бәләкәй, наҡыҫ ♦ **с ма́лых лет** бәләкәйҙән үк, йәштән үк, бала саҡтан уҡ; **са́мое ма́лое** иң кәмендә, кәм тигәндә; **без ма́лого**; **без ма́ла** тип әйтерлек, -ға/-гә яҡын; **без ма́лого сто рубле́й** йөҙ һумға яҡын; **и ста́рый и ма́лый**; **и стар и мал**; **и стар и млад** *см.* **ста́рый**; **от ма́ла до вели́ка** йәше-ҡарты, олоһо-кесеһе; **мал мала́ ме́ньше** береһенән-береһе бәләкәй (*балаларға ҡарата*); **мал золотни́к, да до́рог** аҫыл таш ҙур булмай, алтын ҙур булмай; **за ма́лым де́ло ста́ло** эш юҡҡа ғына туҡтап ҡалды, эш бик бәләкәй нәмәгә килеп терәлде

**МА́ЛЫЙ II** *м*; *разг.* егет (кеше), йәш егет (үҫмер); **сла́вный ма́лый** шәп егет; **у́мный ма́лый** аҡыллы үҫмер ♦ **ма́лый не про́мах** сос егет; **до́брый ма́лый** бына тигән кеше

**МАЛЫ́Ш** *м* и **МАЛЫ́ШКА** *м* и *ж*; *разг.* бәләкәй бала, сабый, бәләкәс, бәпес, бәпәй; **годова́лый малы́ш** бер йәшлек сабый; **трёхле́тняя малы́шка** өс йәшлек бәләкәс ҡыҙ бала

**МАЛЫШО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бәләкәстәр …ы; **малышо́вая гру́ппа** бәләкәстәр төркөмө

**МА́ЛЬВА** *ж* мальва, тырнаҡ гөл

**МА́ЛЬЧИК** *м* малай, ир бала; **роди́лся ма́льчик** ир бала тыуҙы ♦ **Ма́льчик с па́льчик** орсоҡ ҡәҙәр (буйы бер ҡарыш) малай (*халыҡ әкиәттәрендә*)

**МАЛЬЧИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* малайҙар (ир балалар) …ы; **мальчико́вая оде́жда** малайҙар кейеме

**МАЛЬЧИ́ШЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ир балалар (малайҙар) …ы; **мальчи́шеские брю́ки** малайҙар салбары **2.** *перен.* малайҙарса, балаларға хас; **мальчи́шеский посту́пок** малайҙарса ҡыланыш

**МАЛЬЧИ́ШЕСТВО** *с* балалыҡ, малайлыҡ, балаларға хас; **что за мальчи́шество!** был ниндәй малайлыҡ!

**МАЛЬЧИ́ШЕЧИЙ,** -ья, -ье *разг. см.* **мальчи́шеский**

**МАЛЬЧИ́ШКА** *м*; *разг. см.* **ма́льчик**

**МАЛЬЧИ́ШНИК** *м* йәш егеттәр (ир-егеттәр) кисәһе

**МАЛЬЧО́НКА** *м*; *разг.*, *уменьш.-ласк. от* **ма́льчик**

**МАЛЬЧУГА́Н** *м*; *разг.*, *ласк. от* **ма́льчик**

**МАЛЮ́СЕНЬКИЙ,** -ая, -ое *разг.* бәләкәй генә, остоҡ ҡына; **малю́сенькие дома́** бәләкәй генә өйҙәр

**МАЛЮ́ТКА** *м* и *ж* **1.** сабый, бәпес; **малю́тка запла́кал** бәпес илап ебәрҙе **2.** бәләкәй генә, бик бәләкәй; **ло́дка-малю́тка** бәләкәй генә кәмә

**МАЛЯ́Р** *м* маляр, буяусы

**МАЛЯРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** биҙгәк (тапма) …ы; **маляри́йный кома́р** биҙгәк серәкәйе **2.** биҙгәккә (тапмаға) ҡаршы көрәш …ы; **маляри́йная ста́нция** биҙгәккә ҡаршы көрәш станцияһы

**МАЛЯРИ́Я** *ж* биҙгәк, тапма ауырыуы; **тропи́ческая маляри́я** (һары) тропик биҙгәк, һары тапма

**МАЛЯ́РНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* маляр (буяусы) булып эшләү

**МАЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое маляр, буяу …ы; **маля́рная кисть** маляр бумалаһы; **маля́рные рабо́ты** буяу эштәре

**МА́МА** *ж* әсәй, инәй

**МАМА́ША** *ж* **1.** *разг. см.* **ма́ма** **2.** *прост.* (*в обращении к пожилой женщине*) инәй, әбей

**МА́МЕНЬКИН: ма́менькин сыно́к** иркә малай; **ма́менькина до́чка** иркә (наҙлы) ҡыҙ

**МА́МОНТ** *м* мамонт

**МА́МОНТОВЫЙ,** -ая, -ое мамонт …ы; **ма́монтовая кость** мамонт һөйәге

**МАНГА́Л** *м* мангал (*мейес*); **разжига́ть манга́л** мангалға яғып ебәреү

**МА́НГО** *с нескл.* манго (*мәңге йәшел тропик ағас һәм уның емеше*); **сок ма́нго** манго һуты

**МА́НГОВЫЙ,** -ая, -ое манго …ы; **ма́нговое де́рево** манго ағасы

**МАНГУ́СТ** *м* и **МАНГУ́СТА** *ж* мангуста (*тропик йәнлек*)

**МАНДАРИ́Н I** *м* мандарин (*мәңге йәшел цитрус ағас һәм уның емеше*)

**МАНДАРИ́Н II** *м* мандарин (*Боронғо Ҡытайҙа ҙур түрәләргә европалылар тарафынан бирелгән исем*)

**МАНДАРИ́ННЫЙ** и **МАНДАРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое мандарин …ы; **мандари́новое варе́нье** мандарин ҡайнатмаһы

**МАНДА́Т** *м* мандат (*вәкиллекте раҫлаған документ*); **депута́тский манда́т** депутат мандаты

**МАНДА́ТНЫЙ,** -ая, -ое мандат …ы ♦ **манда́тная коми́ссия** мандат комиссияһы

**МАНДОЛИ́НА** *ж*; *муз.* мандолина; **игра́ на мандоли́не** мандолина уйнау

**МАНДРИ́Л** *м* мандрил (*маймыл төрө*)

**МАНЁВР** *м* манёвр (**1.** *һуғыш ваҡытында дошманға һөжүм итеү өсөн ғәскәр күсереү* **2.** *ғәскәр һәм флоттың тактик күнегеүҙәре* **3.** *т. юл. станцияларында поездар составын*

*төҙөү өсөн вагондарҙы юлдан-юлға күсереп йөрөтөү)*

**МАНЁВРЕННОСТЬ** *ж* манёвр яһай белеү (алыу), хәрәкәтсәнлек; **высо́кая манёвренность войск** ғәскәрҙәрҙең етеҙ манёвр яһай алыуы

**МАНЁВРЕННЫЙ,** -ая, -ое манёврлы; **манёвренная война́** манёврлы һуғыш

**МАНЕВРИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *воен.*, *ж.-д.* манёвр яһау **2.** (*лавировать*) оҫта хәрәкәт итеү, манёврлау **3.** *перен.* (*действовать ловко, хитро*) хәйләләшеү, хәйлә менән **4.** *чем*; *перен.* оҫта файҙаланыу; **маневри́ровать сре́дствами** матди сараларҙы оҫта файҙаланыу

**МАНЕВРО́ВЫЙ,** -ая, -ое *ж.-д.* манёвр яһау ...ы; **маневро́вый парово́з** манёвр яһау паровозы

**МАНЕ́Ж** *м* манеж (**1.** *һыбай йөрөү һәм күнегеүҙәр үткәреү өсөн булған бина, майҙан* **2.** *цирк аренаһы* **3.** *тәпәй баҫырға өйрәнә башлаған балалар өсөн ҡамалап алынған күсерелмә майҙансыҡ)*

**МАНЕКЕ́Н** *м* манекен; **шить по манеке́ну** манекенға үлсәп тегеү

**МАНЕКЕ́НЩИК** *м* и **МАНЕКЕ́НЩИЦА** *ж* манекенсы (*күргәҙмәлә кейем өлгөләрен күрһәтеүсе*)

**МАНЕ́Р: на но́вый мане́р** яңыса; **на ста́рый мане́р** иҫкесә; **повяза́ть полоте́нце на мане́р пере́дника** таҫтамалды алъяпҡыс кеүек итеп бәйләү; **таки́м мане́ром** шул рәүешле

**МАНЕ́РА** *ж* **1.** манера, ғәҙәт, рәүеш; **отврати́тельная мане́ра** бик насар ғәҙәт; **мане́ра говори́ть** һөйләү рәүеше **2.** *обычно мн.* **мане́ры** ҡыланыш, үҙ-үҙеңде тотоу рәүеше; **у него́ хоро́шие мане́ры** ул үҙен яҡшы тота **3.** манера, алым, рәүеш; **мане́ра исполне́ния** башҡарыу алымы

**МАНЕ́РНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* ҡылансыҡланыу, борғоланыу

**МАНЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое яһалма, тәбиғи булмаған, ҡылансыҡ; **мане́рные же́сты** ҡылансыҡ хәрәкәттәр

**МАНЖЕ́Т** *м* и **МАНЖЕ́ТА** *ж* манжет (**1.** *күлдәктең йәки блузаның еңе осона әләктереп йәки тегеп ҡуймалы еңсә (беләҙек)* **2.** *салбар балағының ҡайтарма осо*); **манже́ты ко́фты** кофта манжеттары; **манже́ты брюк** салбар манжеттары

**МАНИАКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мания ...ы; **маниака́льное состоя́ние** мания хәле

**МАНИКЮ́Р** *м* маникюр; **сде́лать маникю́р** маникюр яһау (эшләү)

**МАНИКЮ́РНЫЙ,** -ая, -ое маникюр ...ы; **маникю́рные но́жницы** маникюр ҡайсыһы

**МАНИКЮ́РША** *ж* маникюрсы, маникюр яһаусы (*ҡатын-ҡыҙ*)

**МАНИ́ЛОВЩИНА** *ж*; *неодобр.* маниловсылыҡ, буш хыялға бирелеүсәнлек

**МАНИПУЛИ́РОВАТЬ** *несов. чем, с чем* **1.** манипуляция яһау (*ҡул менән эшләгәндә ҡатмарлы хәрәкәттәр яһау*); **манипули́ровать со счётными прибо́рами** иҫәпләү приборҙары менән манипуляция яһау **2.** *перен.* алдау, хәйлә ҡороу

**МАНИПУЛЯ́ТОР** *м* манипулятор (**1.** *ҡул менән эшләгәндә ҡатмарлы хәрәкәттәр яһаусы* **2.** *цирк. артист, фокуссы, фокус күрһәтеүсе* **3.** *тех. телеграф сигналдарын тапшырыу аҫҡысы*)

**МАНИПУЛЯ́ЦИЯ** *ж* манипуляция (**1.** *ҡул менән эшләгәндә ҡатмарлы хәрәкәт, алым* **2.** *цирк. ҡулдарҙың сос, етеҙ хәрәкәтенә нигеҙләнгән фокустар күрһәтеү* **3.** *күсм.*, *һөйл. алдау, хәйләле ялған эш*); **манипуля́ции в ручно́й рабо́те** ҡул эшендәге манипуляциялар; **манипуля́ции циркового́ арти́ста** цирк артисының манипуляциялары; **манипуля́ция с кру́пной су́ммой де́нег** ҙур аҡса менән эш итеү, алдау

**МАНИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** (ымлап) саҡырыу; **мани́ть щенка́** көсөктө саҡырыу **2.** *перен.* үҙенә тартыу (ылыҡтырыу), йәлеп итеү; **мо́ре ма́нит** диңгеҙ үҙенә ылыҡтыра

**МАНИФЕ́СТ** *м* манифест; **Манифе́ст об освобожде́нии кресться́н** Крәҫтиәндәрҙе азат итеү тураһында манифест; **манифе́ст футури́стов** футуристар манифесы

**МАНИФЕСТА́ЦИЯ** *ж* манифестация; **манифеста́ция солида́рности** теләктәшлек манифестацияһы

**МАНИФЕСТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* манифестацияла ҡатнашыу

**МАНИ́ШКА** *ж* манишка, күкрәксә; **руба́шка с вы́шитой мани́шкой** сигелгән манишкалы күлдәк; **мани́шка с белосне́жным отложны́м воротничко́м** ап-аҡ ҡайтарма яғалы күкрәксә

**МА́НИЯ** *ж* **1.** мания (*психик ауырыу*); **ма́ния пресле́дования** эҙәрлекләү манияһы (*кемдәрҙер эҙәрлекләй тип һаташыу*) **2.** *перен.* артыҡ ныҡ бирелеү (мауығыу), донъяны онотоу, мөкиббән китеү; **ма́ния писа́ть стихи́** шиғырҙар яҙыу менән артыҡ мауығыу

**МА́НКА** *ж*; *разг.* манный ярмаһы

**МАНКИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. чем* иғтибарһыҙ (һалҡын) ҡарау

**МА́ННА: как ма́нны небе́сной (ждать)** бик ныҡ, түҙемһеҙләнеп (көтөү)

**МА́ННЫЙ,** -ая, -ое манный ...ы; **ма́нная ка́ша** манный бутҡаһы ♦ **ма́нная крупа́** манный ярмаһы (*бойҙайҙан әҙерләнгән бик ваҡ ярма*)

**МАНОВЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* ишара; **манове́ние руки́** ҡул менән ишара яһау ♦ **бу́дто (как, сло́вно, то́чно) по манове́нию волше́бного же́зла (волше́бной па́лочки)** күҙ асып йомғансы

**МАНО́К** *м*; *охот.* һыбыҙғы; **отозва́ться на мано́к** һыбыҙғыға яуап итеп тауыш биреү

**МАНО́МЕТР** *м*; *физ.* манометр; **показа́ние мано́метра** манометр күрһәтеүе

**МАНСА́РДА** *ж* мансарда (*сарлаҡтағы торлаҡ бүлмә*); **дом с манса́рдой** мансардалы йорт

**МА́НСИ** *мн. нескл.* (*ед.* **ма́нси** *м* и *ж*) мансиҙар, манси халҡы; *см.* **манси́йцы**

**МАНСИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое манси ...ы; **манси́йский язы́к** манси теле

**МАНСИ́ЙЦЫ** *мн.* мансиҙар, манси халҡы // *ед.* **манси́ец** *м* манси ир-аты; **манси́йка** *ж* манси ҡатын-ҡыҙы

**МА́НТИЯ** *ж* мантия (**1.** *плащ кеүек кейем* **2.** *зоол. ҡусҡарҙарҙың тире йыйырсығы* **3.** *геол. Ер ҡабығы аҫтындағы эске ҡатлам*)

**МАНТО́** *с нескл.* манто (*йәнлек тиреһенән киң, оҙон итеп тегелгән ҡатын-ҡыҙ пальтоһы*)

**МАНУ́Л** *м* манул (*затлы тиреле йыртҡыс дала бесәйе*)

**МАНУСКРИ́ПТ** *м*; *книжн.* манускрипт (*боронғо ҡульяҙма*); **собра́ние манускри́птов** манускрипттар йыйынтығы

**МАНУФАКТУ́РА** *ж* мануфактура (**1.** *капиталистик производствоның ҡул хеҙмәтенә ҡоролған тәүге ябай формаһы* **2.** *иҫк. туҡыу фабрикаһы* **3.** *туҡыма, тауар*)

**МАНЬЧЖУ́РСКИЙ,** -ая, -ое манжур ...ы, Манжурия ...ы; **маньчжу́рский язы́к** манжур теле

**МАНЬЧЖУ́РЫ** *мн.* манжурҙар, манжур халҡы // *ед.* **маньчжу́р** *м* манжур ир-аты; **маньчжу́рка** *ж* манжур ҡатын-ҡыҙы

**МАНЬЯ́К** *м* маньяк (*манияға бирелеп киткән кеше*)

**МАНЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **мани́ть** **2.** *прил.* үҙенә тартыусы (ылыҡтырыусы), йәлеп итеүсе, ҡыҙыҡтырғыс; **маня́щие перспекти́вы** ҡыҙыҡтырғыс перспективалар

**МАРАБУ́** *м нескл.* марабу (**1.** *оҙон суҡышлы, күпереп торған матур йөнлө тропик ҡош* **2.** *шул ҡоштоң биҙәүес итеп ҡулланылған ҡауырһыны*)

**МАРА́ЗМ** *м* маразм; **ста́рческий мара́зм** ҡартлыҡ маразмы

**МАРА́Л** *м* марал (*эре себер боланы*)

**МАРА́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *что* бысратыу, буяу; **мара́ть пла́тье** күлдәкте бысратыу **2.** *кого-что*; *перен.* ҡара яғыу, яманлау; **мара́ть че́стное и́мя** намыҫына ҡара яғыу **3.** *что* яҙғылап маташыу; **мара́ть стихи́** шиғырҙар яҙғылап маташыу **4.** *что* яҙылғанды һыҙып ташлау; **мара́ть це́лые страни́цы** күп кенә биттәрҙе һыҙып ташлау ♦ **мара́ть бума́гу** ҡағыҙ бысратыу (*уңышһыҙ нәмә яҙыу*); **мара́ть ру́ки** *об кого, обо что* теләмәгән эшкә ҡыҫылыу, ҡул бысратыу

**МАРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* бысраныу, буялыу; **све́тлая оде́жда бы́стро мара́ется** асыҡ төҫтәге кейем тиҙ бысрана **2.** *перен.*, *прост.* (*ввязываться в грязное дело*) тығылыу, бысраныу; **мара́ться не хо́чется** бысранғы килмәй

**МАРАФО́Н** *м*; *разг.* марафон; **лы́жный марафо́н** саңғы марафоны

**МАРАФО́НСКИЙ,** -ая, -ое *спорт.* марафон ...ы; **марафо́нский заплы́в** марафон йөҙөшө ♦ **марафо́нский бег** марафон йүгереше (*42 км 195 м араға йүгереү*)

**МА́РГАНЕЦ** *м* марганец (*химик элемент, металл*)

**МА́РГАНЦЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** марганец ...ы; **ма́рганцевое месторожде́ние** марганец ятҡылығы **2.** марганецлы; **ма́рганцевая сталь** марганецлы ҡорос

**МАРГАНЦО́ВКА** *ж*; *разг.* марганцовка

**МАРГАНЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое марганцовкалы; **марганцо́вый раство́р** марганцовкалы иретмә

**МАРГАРИ́Н** *м* маргарин

**МАРГАРИ́ТКА** *ж* маргаритка (*гөл*)

**МА́РЕВО** *с* **1.** *см.* **мира́ж** **2.** (*дымка, туман*) монар, һағым; **оку́таться ма́ревом** монарға сорналыу

**МАРЕ́НА** *ж* марена (*үлән*)

**МАРЕ́НГО** *с нескл.* **1.** аҡ ептәре булған ҡара туҡыма **2.** *в знач. прил.* һорғолт ҡара (*төҫ*); **пальто́ маре́нго** һорғолт ҡара пальто

**МА́РИ** *мн. нескл.* (*ед.* **ма́ри** *м* и *ж*) марийҙар, мари халҡы; *см.* **мари́йцы**

**МАРИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое мари ...ы; **мари́йский язы́к** мари теле

**МАРИ́ЙЦЫ** *мн.* мариҙар, мари халҡы // *ед.* **мари́ец** *м* мари ир-аты; **мари́йка** *ж* мари ҡатын-ҡыҙы

**МАРИ́НА** *ж*; *иск.* марина (*диңгеҙҙе тасуирлаған рәсем*); **мари́ны Айвазо́вского** Айвазовскийҙың мариналары

**МАРИНА́Д** *м* маринад (**1.** *әсе һеркә һәм төрлө тәмләткестәр һалып яһалған шыйыҡса* **2.** *һаҡлау өсөн шул шыйыҡсаға һалып, ябып ҡуйылған емеш, йәшелсә*); **тома́ты в марина́де** маринадтағы помидор, маринадланған помидор; **дома́шние марина́ды** өйҙә яһалған маринадтар

**МАРИНИ́СТ** *м*; *иск.* маринасы (*диңгеҙ күренештәрен һүрәтләүсе рәссам*)

**МАРИНОВА́НИЕ** *с см.* **маринова́ть**

**МАРИНОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* маринадлау; **маринова́ть помидо́ры** помидор маринадлау **2.** *перен.*, *разг.* тоҡтарлап тороу, ҡарамай ятҡырыу, юрый кисектереү; **маринова́ть де́ло** эште тоҡтарлап тороу

**МАРИОНЕ́ТКА** *ж* **1.** марионетка, ҡурсаҡ; **теа́тр марионе́ток** ҡурсаҡ театры **2.** *перен.* марионетка (*кеше һүҙе менән генә йөрөүсе, кеше ҡурайына бейеүсе*)

**МАРИХУА́НА** *ж* марихуана (*наркотик матдә*)

**МА́РКА I** *ж* **1.** марка; **почто́вая ма́рка** почта маркаһы **2.** (*знак, клеймо*) көләймә, тамға; **фабри́чная ма́рка** фабрика көләймәһе **3.** *перен.*, *разг.* дәрәжә, абруй, репутация; **держа́ть ма́рку** дәрәжәне төшөрмәү **4.** сорт, сифат; **но́вые ма́рки ста́ли** ҡоростоң яңы сорттары

**МА́РКА II** *ж* марка (*ҡайһы бер сит илдәрҙә аҡса бирәмеге*)

**МАРКЁР** *м*; *с.-х* маркёр; **провести́ маркёром боро́здку** маркёр менән бураҙна һыҙыу (һуҙыу)

**МАРКИ́З** *м* маркиз (*Көнбайыш Европа илдәрендә дворянлыҡ титулы һәм шул титулдағы кеше*)

**МАРКИ́ЗА** *ж* маркиздың ҡатыны, маркиздың ҡыҙы

**МАРКИЗЕ́Т** *м* маркизет (*туҡыма*); **шёлковый маркизе́т** ебәк маркизет

**МА́РКИЙ,** -ая, -ое тиҙ керегеүсән, кер күтәрмәй торған; **ма́ркий цвет** кер күтәрмәй торған төҫ

**МАРКИРОВА́ТЬ I** *сов., несов. что*; *спец.* (*поставить клеймо*) келәймә (тамға) һуғыу

**МАРКИРОВА́ТЬ II** *сов., несов. что*; *с.-х.* маркировкалау, маркёр менән бураҙна һуҙыу; **маркирова́ть уча́сток под капу́сту** кәбеҫтә ултыртыу өсөн участканы маркировкалау

**МАРКИРО́ВКА I** *ж см.* **маркирова́ть** I

**МАРКИРО́ВКА II** *ж см.* **маркирова́ть** II

**МАРКИРО́ВЩИК** *м* маркировкалаусы, келәймә (тамға) һуғыусы; **маркиро́вщик това́ров** тауарға тамға һуғыусы

**МАРКСИ́ЗМ** *м* марксизм (*тәғлимәт*)

**МАРКСИ́ЗМ-ЛЕНИНИ́ЗМ** *м* марксизм-ленинизм (*тәғлимәт*)

**МАРКСИ́СТ** *м* марксист (*марксизм яҡлы кеше*)

**МАРКСИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое марксистик; **маркси́стский ме́тод** марксистик ысул

**МАРКШЕ́ЙДЕР** *м*; *геод., геол.* маркшейдер

**МА́РЛЕВЫЙ,** -ая, -ое марля ...ы; **ма́рлевая подкла́дка** марля эслек

**МАРМЕЛА́Д** *м* мармелад

**МАРОДЁР** *м* мародёр (**1.** *һуғыш ҡырында үлгән йәки яралы кешеләрҙе талаусы*; *һуғыш ваҡытында халыҡты талап йөрөүсе* **2.** *һөйл. алыпһатар*)

**МАРОДЁРСТВО** *с* мародёрлыҡ; **обвини́ть в мародёрстве** мародёрлыҡта ғәйепләү

**МАРОДЁРСТВОВАТЬ** *несов.* мародёрлыҡ итеү

**МАРОККА́НСКИЙ,** -ая, -ое мароккан ...ы, Марокко ...ы; **марокка́нский диале́кт** мароккан диалекты

**МАРОККА́НЦЫ** *мн.* мароккалылар, мароккандар, мароккан халҡы // *ед.* **марокка́нец** *м* мароккан ир-аты; **марокка́нка** *ж* мароккан ҡатын-ҡыҙы

**МА́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** марка ...ы; **ма́рочная коро́бка** марка тартмаһы **2.** сортлы, маркалы; **ма́рочная сталь** маркалы ҡорос ♦ **ма́рочные ви́на** маркалы шараптар

**МАРСЕЛЬЕ́ЗА** *ж* Марсельеза (*Францияның милли гимны*)

**МАРТ** *м* март, март айы

**МАРТЕ́Н** *м* мартен (**1.** *мейес* **2.** *ҡорос*)

**МАРТЕ́НОВСКИЙ,** -ая, -ое мартен ...ы; **марте́новский цех** мартен цехы ♦ **марте́новская печь** мартен мейесе; **марте́новская сталь** мартен ҡоросо

**МА́РТОВСКИЙ,** -ая, -ое март ...ы; **ма́ртовский день** март көнө

**МАРТЫ́ШКА** *ж* мартышка (*маймыл*)

**МАРТЫ́ШКИН,** -а, -о мартышка ...ы; **марты́шкин хвост** мартышка ҡойроғо ♦ **мартышкин труд** файҙаһыҙ (кәрәкһеҙ) эш

**МАРШ I** *м* **1.** (*ходьба в строю*) марш; **торже́ственный марш** тантаналы марш **2.** (*передвижение войск*) марш; **ночно́й марш отря́да** отрядтың төнгө маршы **3.** (*музыкальное произведение*) марш; **марш для орке́стра** оркестр өсөн яҙылған марш; **похоро́нный марш** матәм маршы

**МАРШ II** *межд.* **1.** *воен.* (*команда*) марш! **2.** *разг.* кит (әле); **марш отсю́да** кит бынан

**МА́РШАЛ** *м* маршал; **ма́ршал авиа́ции** авиация маршалы

**МА́РШАЛЬСКИЙ,** -ая, -ое маршал ...ы; **ма́ршальские пого́ны** маршал погондары

**МА́РШЕВЫЙ,** -ая, -ое **1.** марш ...ы; **ма́ршевый поря́док стро́я** сафтың марш тәртибе **2.** марштағы; **ма́ршевый батальо́н** марштағы батальон

**МАРШИРОВА́ТЬ** *несов.* маршта йөрөү; **маршировать коло́нной** колонна менән маршта йөрөү

**МАРШИРО́ВКА** *ж см.* **маршировать**

**МАРШРУ́Т** *м* маршрут; **маршру́т перелёта** осоу маршруты; **маршру́т тури́стского похо́да** туристик поход маршруты

**МАРШРУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое маршрут ...ы, маршрутлы; **маршру́тный указа́тель** маршрут күрһәткесе ♦ **маршру́тное такси́** маршрут таксийы; **маршру́тный по́езд** *ж.-д.* маршрут поезы (*билдәләнгән пунктҡа тиклем йөгө, составы үҙгәртелмәй бара торған поезд*); **маршру́тная съёмка** маршруттың һыҙмаһы (*топографик һыҙмаһы*)

**МА́СКА** *ж*; *в разн. знач.* маска, битлек; **ма́ска медве́дя** айыу маскаһы; **лече́бная ма́ска** дауалау маскаһы; **противога́зная ма́ска** противогаз битлеге **2.** *перен.* битлек; **ма́ска простоду́шия** яһалма эскерһеҙлек битлеге ♦ **наде́ть (на себя́) ма́ску** ысын йөҙҙө йәшереү; **сбро́сить ма́ску** битлекте һалыу, ысын йөҙөңдө күрһәтеү; **сорва́ть ма́ску** *с кого* ысын йөҙөн асыу, фаш итеү

**МАСКАРА́Д** *м*; *прям., перен.* маскарад; **нового́дний маскара́д** Яңы йыл маскарады; **маскара́д равноду́шия** вайымһыҙлыҡ маскарады

**МАСКАРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое маскарад ...ы; **маскара́дный костю́м** маскарад костюмы

**МАСКИРОВА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого* маска кейҙереү; **маскирова́ть дете́й** балаларға маска кейҙереү **2.** *что* маскировкалау; **маскирова́ть**

**орудие** коралды маскировкалау **3.** *что*; *перен.* йәшереү; **маскировать свой чувства** үҙеңдең тойғоларыңды йәшереү

**МАСКИРОВАТЬСЯ** *несов.* **1.** маскарад костюмы кейеү, маска кейеү; **маскироваться русалкой** һыу инәһе маскаһын кейеү **2.** йәшеренеү; **маскироваться от врагов** дошмандарҙан йәшеренеү **3.** *перен.* уйҙы (хисте, ысын йөҙҙө) йәшереү, булып ҡыланыу; **научиться маскироваться и хитрить** ысын йөҙҙө йәшерергә һәм хәйләләшергә өйрәнеү **4.** *страд. от* **маскировать**

**МАСКИРОВКА** *ж* **1.** *см.* **маскировать, маскироваться 2.** (*то, чем маскируются*) маскировка; **штора маскировки** маскировка пәрҙәһе

**МАСКИРОВОЧНЫЙ,** -ая, -ое маскировка ...ы; **маскировочный халат** маскировка халаты

**МАСЛЕНИЦА** *ж* Масленица (*боронғо славян һәм ҡайһы бер халыҡтарҙа ҡышты оҙатыуға бағышланған мәжүси байрамдарҙың береһе, христиан календары буйынса пост алдынан үткәрелә*)

**МАСЛЁНКА** *ж* **1.** май һауыты **2.** *тех.* майлағыс

**МАСЛЁНОК** *м* майлы бәшмәк

**МАСЛЕНЫЙ,** -ая, -ое *прям., перен.* майлы; **масленая каша** майлы бутҡа; **масленые глаза** майлы күҙҙәр; **масленые руки** майлы ҡулдар

**МАСЛИНА** *ж* зәйтүн (*ағасы һәм емеше*)

**МАСЛИТЬ** *несов. что* майлау, май һөртөү; **маслить кашу** бутҡаны майлау

**МАСЛИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** майланыу, майы сығыу; **замазка маслится** замазканың майы сыға; **глаза маслятся** күҙҙәр майланып тора **2.** *страд. от* **маслить**

**МАСЛИЧНЫЙ,** -ая, -ое май ...ы, май бирә торған; **масличные культуры** май бирә торған үҫемлектәр

**МАСЛИЧНЫЙ,** -ая, -ое зәйтүн ...ы; **масличные ягоды** зәйтүн емеше ♦ **масличное дерево** зәйтүн ағасы

**МАСЛО** *с* **1.** май; **сливочное масло** аҡ май; **топлёное масло** һары май; **подсолнечное масло** көнбағыш майы; **машинное масло** машина майы; **смазочное масло** майлай торған май **2.** *иск.* (*масляная краска*) майлы буяу ♦ **масло масляное** майлы май (*бер үк нәмәне төрлө һүҙҙәр менән ҡабатлап әйтеү*); **как по маслу** майланған кеүек; **ерунда (чепуха) на постном масле** буш нәмә

**МАСЛО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "май" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **маслозавод** май заводы

**МАСЛОБОЙКА** *ж* **1.** (*аппарат*) көбө, май яҙғыс **2.** *разг.* (*предприятие*) май һығыу заводы

**МАСЛОБОЙНЫЙ,** -ая, -ое май һығыу (етештереү) ...ы; **маслобойный завод** май һығыу заводы

**МАСЛОБОЙНЯ** *ж* май һығыу заводы

**МАСЛОДЕЛ** *м* май етештереүсе (яҙыусы)

**МАСЛОДЕЛИЕ** *с* май яҙыу (*етештереү, эшләп сығарыу*)

**МАСЛОДЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое май ...ы, май эшләп сығарыу (етештереү) ...ы; **маслодельный цех** май эшләп сығарыу цехы

**МАСЛОЗАВОД** *м* май заводы

**МАСЛЯНИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** майлы; **маслянистый сыр** майлы сыр **2.** майланып (ялтырап) торған; **маслянистые листочки** ялтырап торған япраҡтар

**МАСЛЯНЫЙ,** -ая, -ое **1.** май ...ы; **масляное пятно** май табы **2.** *иск.* майлы; **масляная краска** майлы буяу; **масляный портрет** майлы буяуҙар менән эшләнгән портрет **3.** *тех.* майҙа (май менән) эшләгән; **масляный насос** май менән эшләгән насос

**МАСОН** *м* масон (*масонсылыҡ ағзаһы*)

**МАСОНСТВО** *с* масонсылыҡ (*XVII б. башында барлыҡҡа килгән дини-этик хәрәкәт*)

**МАССА** *ж* **1.** масса; **масса тела** есем массаһы; **масса воды** һыу массаһы; **сырковая масса** эремсек массаһы; **народные массы** халыҡ массаһы **2.** *чего*; *разг.* бик күп, донъя; **масса народу** бик күп халыҡ

**МАССАЖ** *м* массаж; **лечение массажем** массаж менән дауалау; **делать массаж** массаж яһау, һылау

**МАССАЖИСТ** *м* и **МАССАЖИСТКА** *ж* массаж яһаусы (һылаусы)

**МАССАЖНЫЙ,** -ая, -ое массаж ...ы; **массажная щётка** массаж щёткаһы

**МАССИВ** *м*; *в разн. знач.* массив; **горный массив** тау массивы; **лесные массивы** урман массивтары

**МАССИВНЫЙ,** -ая, -ое ауыр, ҙур; **массивная дверь** ауыр ишек; **массивное тело** ҙур ауыр кәүҙә

**МАССИРОВАННЫЙ,** -ая, -ое *воен.* **1.** *прич. от* **массировать** II; **2.** *прил.* тупланған, берләштерелгән, бер урынға төбәлгән; **массированный налёт авиации** бер урынға төбәлгән көслө авиация һөжүме

**МАССИРОВАТЬ I** *несов. кого-что* массаж яһау, һылау; **массировать место ушиба** бәрелгән урынға массаж яһау

**МАССИРОВАТЬ II** *сов., несов. что*; *воен.* бер урынға туплау (*ғәскәрҙе, артиллерияны һ.б.*); **массировать войска** ғәскәрҙе бер урынға туплау

**МАССОВИК** *м*; *разг.* массовик (**1.** *күмәк уйын ойоштороусы* **2.** *халыҡ араһында эшләүсе*)

**МАССОВКА** *ж*; *в разн. знач.* массовка; **воскресная массовка** йәкшәмбе көнөндәге массовка; **гримировать участников массовок** массовкаларҙа ҡатнашыусыларҙы гримлау

**МАССОВОСТЬ** *ж* киң таралғанлыҡ (йәйелгәнлек)

**МА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* киң, күмәк, күпләп, күп кеше ҡатнашҡан; **ма́ссовое движе́ние рабо́чих** эшселәрҙең күмәк хәрәкәте; **това́ры ма́ссового потребле́ния** киң ҡулланыу тауарҙары; **ма́ссовое произво́дство това́ров** тауарҙы күпләп етештереү

**МА́СТЕР** *м* **1.** мастер; **сме́нный ма́стер** смена мастеры; **часово́й ма́стер** сәғәт мастеры; **ма́стер спо́рта** спорт мастеры **2.** оҫта; **ма́стер худо́жественного сло́ва** нәфис һүҙ оҫтаһы; **ма́стер говори́ть** оҫта һөйләүсе ♦ **ма́стер на все ру́ки** ҡулы алтын, алтын ҡуллы (*бөтә эш ҡулынан килә*); **ма́стер своего́ де́ла** үҙ эшенең оҫтаһы (маһиры)

**МАСТЕРИ́ТЬ** *несов. что*; *разг.* яһау, әтмәләү (*гәҙәттә, ҡул менән*); **мастери́ть ку́клу** ҡурсаҡ яһау

**МАСТЕРИ́ЦА** *ж* **1.** (*работница*) мастер ҡатын-ҡыҙ **2.** *на что* и *с неопр.*; *разг.* оҫта ҡатын-ҡыҙ; **мастери́ца пляса́ть** бейергә оҫта ҡатын-ҡыҙ

**МАСТЕРО́К** *м* **1.** *разг., уменьш.-ласк. от* **ма́стер 2.** мастерок (*төҙөлөш эшендә иҙмәне һылай торған ҡалаҡ төрө*)

**МАСТЕРСКА́Я** *ж* оҫтахана; **столя́рная мастерска́я** ағас эше оҫтаханаһы

**МАСТЕРСКИ́** и *разг.* **МА́СТЕРСКИ** *нареч.* бик оҫта, үрнәк булырлыҡ; **мастерски́ исполня́ть наро́дные пе́сни** халыҡ йырҙарын бик оҫта башҡарыу

**МА́СТЕРСКИЙ,** -ая, -ое мастер ...ы; **ма́стерский значо́к** мастер значогы

**МАСТЕРСКО́Й,** -ая, -ое бик оҫта, бик яҡшы, үрнәк булырлыҡ; **мастерска́я вы́делка ко́жи** бик яҡшы иләнгән тире

**МАСТЕРСТВО́** *с* **1.** һөнәр; **слеса́рное мастерство́** слесарь һөнәре **2.** оҫталыҡ; **актёрское мастерство́** актёр оҫталығы

**МАСТИ́КА** *ж* мастика (**1.** *йәбештереү өсөн ҡулланылған ҡуйы матдә* **2.** *паркет иҙәнде ышҡыу өсөн балауыҙ ҡушып яһалған матдә* **3.** *хуш еҫле ағас ыҫмалаһы*)

**МАСТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *спец.* (*о лошади*) саф төҫлө, бер төҫлө (*башҡа төҫ ҡатнашмаған*); **масти́стая ло́шадь** бер төҫлө (яҡшы) ат

**МАСТИ́Т** *м*; *мед.* мастит (*түш шешеүе*)

**МАСТИ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** өлкән, оло йәштәге; **масти́тый ста́рец** оло йәштәге ҡарт **2.** күп хеҙмәт күрһәткән, хөрмәт ҡаҙанған, арҙаҡлы; **масти́тый писа́тель** арҙаҡлы яҙыусы; **масти́тый учёный** күп хеҙмәт күрһәткән ғалим

**МАСТОДО́НТ** *м* мастодонт (*филгә оҡшаған ҡаҙылдыҡ эре хайуан*)

**МАСТЬ** *ж* **1.** төҫ; **ло́шадь вороно́й ма́сти** ҡара төҫтәге ат **2.** *карт.* масть, төҫ; **черво́нная масть** черви төҫө

**МАСШТА́Б** *м*; *прям., перен.* масштаб; **масшта́б 100 киломе́тров в сантиме́тре** масштабы бер сантиметрға йөҙ километр; **учёный мирово́го масшта́ба** донъя масштабындағы ғалим

**МАСШТА́БНОСТЬ** *ж* масштаблылыҡ, киң ҡоласлылыҡ; **масшта́бность пла́нов** пландарҙың масштаблылығы

**МАСШТА́БНЫЙ,** -ая, -ое *прям., перен.* масштаблы; **масшта́бная лине́йка** масштаблы линейка; **масшта́бные зада́чи** масштаблы мәсьәләләр

**МАТ I** *м*; *шахм.* мат; **объяви́ть мат** мат ҡуйыу

**МАТ II** *м* (*подстилка, циновка*) мат; **пры́гнуть на мат** матҡа һикереү

**МАТ III** *м*; *спец.* тоноҡлоҡ; **нанести́ мат на стекло́** быяланы тоноҡландырыу, быялаға тоноҡлоҡ биреү (йүгертеү)

**МАТ IV: благи́м ма́том (крича́ть, ора́ть и т.п.)** *прост.* бик әсе, бөтә көскә (ҡысҡырыу, аҡырыу һ.б.)

**МАТАДО́Р** *м* матадор (*Испанияла үгеҙ һуғышында ҡатнашыусы төп һуғышсы*)

**МАТЕМА́ТИК** *м* математик (*белгес*)

**МАТЕМА́ТИКА** *ж* математика; **вы́сшая матема́тика** юғары математика

**МАТЕМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** математика ...ы; **математи́ческие те́рмины** математика терминдары **2.** математик; **математи́ческий ана́лиз** математик анализ **3.** *перен.* (*точный*) математикалағы кеүек, теүәл; **математи́ческая то́чность** математикалағы кеүек теүәллек

**МАТЕРИА́Л** *м*; *в разн. знач.* материал; (*ткань*) туҡыма; **строи́тельный материа́л** төҙөлөш материалы; **горю́чий материа́л** яғыулыҡ материалы; **фолькло́рный материа́л** фольклор материалы; **материа́лы для докла́да** доклад өсөн материалдар; **материа́л на пла́тье** күлдәклек туҡыма

**МАТЕРИАЛИ́ЗМ** *м*; *филос.* материализм; **диалекти́ческий материали́зм** диалектик материализм

**МАТЕРИАЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* материаллаштырыу, күҙгә күренер хәлгә килтереү, -ға/-гә әүерелдереү; **материализова́ть иде́и в произведе́ние иску́сства** уй-фекерҙәрҙе сәнғәт әҫәренә әүерелдереү

**МАТЕРИАЛИЗОВА́ТЬСЯ** *книжн.* **1.** *сов., несов.* материаллашыу, күҙгә күренер хәлгә килеү, материал формаһына әйләнеү **2.** *несов. страд. от* **материализова́ть**

**МАТЕРИАЛИ́СТ** *м* материалист (**1.** *фәлс. материализм яҡлы кеше* **2.** *матди файҙаны ғына ҡыҙәтеүсе кеше*)

**МАТЕРИАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *филос.* материалистик; **материалисти́ческий взгляд на жизнь** тормошҡа материалистик ҡараш

**МАТЕРИАЛИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **материалисти́ческий 2.** шәхси мәнфәғәттәргә генә ҡоролған; **материалисти́чные взгля́ды** шәхси мәнфәғәттәргә генә ҡоролған ҡараш

**МАТЕРИА́ЛЬНО** *нареч.* материаль (матди) яҡтан; **материа́льно обеспе́чен** материаль яҡтан тәьмин ителгән

**МАТЕРИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** материал ...ы; **материа́льный склад** материал склады **2.** материаль, матди; **материа́льное положе́ние** матди хәл **3.** материаль; **материа́льный мир** материаль донъя ♦ **материа́льная часть** *спец.* техник йыһаздар

**МАТЕРИ́К** *м*; *геогр.* материк, ҡоро ер

**МАТЕРИКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *геогр.* материк ...ы; **материко́вый лёд** материк боҙо

**МАТЕРИ́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** әсә ...ы; **матери́нский дом** әсә йорто **2.** әсәләрсә ...ы, әсәләргә хас; **матери́нская ла́ска** әсәләргә хас иркәләү

**МАТЕРИ́НСТВО** *с* әсәлек; **чу́вство матери́нства** әсәлек тойғоһо

**МАТЕ́РИЯ** *ж*; *в разн. знач.* материя; (*ткань, материал*) туҡыма; **мате́рия — филосо́фская катего́рия** материя — фәлсәфәүи категория; **строе́ние мате́рии** материя төҙөлөшө; **шерстяна́я мате́рия** йөн туҡыма; **говори́ть о высо́ких мате́риях** юғары материялар тураһында һөйләү

**МАТЁРЫЙ,** -ая, -ое **1.** таҙа, ныҡлы, көс ултырған, ҡарт; **матёрый волк** ҡарт бүре **2.** *разг.* тәжрибәле, шымарған; **матёрый плове́ц** тәжрибәле йөҙөүсе **3.** *перен.* ата, яуыз, сей; **матёрый бюрокра́т** ата бюрократ; **матёрый враг** яуыз дошман

**МАТЕ́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое материянан (туҡыманан) эшләнгән; **мате́рчатый переплёт кни́ги** материянан эшләнгән китап тышы

**МА́ТИЦА** *ж* өрләк

**МА́ТКА** *ж* **1.** *анат.* аналыҡ, балаятҡы **2.** (*самка животного*) инә; **ма́тка оле́ня** инә болан **3.** *пчел.* инә ҡорт

**МА́ТОВЫЙ,** -ая, -ое тоноҡ, ялтырауыҡһыҙ; **ма́товая фотобума́га** ялтырауыҡһыҙ фотокағыҙ; **ма́товая ла́мпочка** тоноҡ электр лампаһы

**МА́ТОЧНИК** *м* **1.** *пчел.* инә ҡорт күҙәнәге **2.** *пчел.* ситлек; **помести́ть пчели́ную ма́тку в ма́точник** ҡорт инәһен ситлеккә бикләү **3.** *с.-х.* инә (төп) үҫемлек **4.** *сад.* үрсетмә(лек) **5.** *бот.* емешлек, емшән

**МА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *анат.* аналыҡ (балаятҡы) ...ы; **ма́точное кровотече́ние** аналыҡтан ҡан китеү **2.** *пчел.* инә ҡорт ...ы; **ма́точная яче́йка в со́тах** кәрәҙҙәге инә ҡорт күҙәнәге **3.** инә ...ы; **ма́точное поголо́вье скота́** инә мал(дар) һаны

**МАТРА́С** и **МАТРА́Ц** *м* матрас; **волосяно́й матра́с** ҡыл матрас

**МАТРЁШКА** *ж* матрёшка (*бәләкәйерәктәре бер-береһенең эсенә ҡуйыла торған ҡурсаҡ*)

**МАТРИАРХА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое матриархаль; **матриарха́льный род** матриархаль ырыу

**МАТРИАРХА́Т** *м* матриархат (*ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнлөгөнә нигеҙләнгән тәүтормош йәмғиәт рәүеше*)

**МА́ТРИЦА** *ж*; *тех.* матрица, ҡалып (*штамплау эшендә һәм типографияла ҡулланыла*)

**МАТРИЦИ́РОВАНИЕ** *с см.* **матрици́ровать**

**МАТРИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *типогр.* матрицалау, матрицаға һалыу, матрицаһын алыу; **матрици́ровать набо́р** йыйылған хәрефтәрҙе матрицаға һалыу

**МАТРО́С** *м* матрос; **служи́ть матро́сом** матрос булып хеҙмәт итеү

**МАТРО́СКА** *ж* матроска (*ҙур ҡайтарма яғалы матрос күлдәге*)

**МАТРО́ССКИЙ,** -ая, -ое матрос ...ы; **матро́сская фо́рма** матрос формаһы

**МА́ТУШКА** *ж*; *разг.* әсәй, инәй ♦ **ма́тушки (мои́)!** *в знач. межд.* әсәкәйем (инәкәйем)! (*иҫ китеүҙе, шатлыҡты, ҡурҡыуҙы һ.б. аңлата*)

**МАТЧ** *м* матч, ярыш; **футбо́льный матч** футбол ярышы

**МА́ТЧ-ТУРНИ́Р** *м* шахмат ярышы

**МАТЬ** *ж* **1.** әсә, инә **2.** (*самка*) инә ♦ **ма́ть-герои́ня** герой әсә; **ма́ть-одино́чка** яңғыҙ әсә (*рәсми никахта тормайынса бала тапҡан һәм яңғыҙы тәрбиәләгән әсә*)

**МАТЬ-И-МА́ЧЕХА** и **МАТЬ-МА́ЧЕХА** *ж* үгәй инә үләне

**МА́УЗЕР** *м* маузер (*автомат-пистолет төрө*)

**МАФИО́ЗИ** *м нескл.* мафия ағзаһы

**МА́ФИЯ** *ж* мафия (*гангстерҙарҙың берләшмәләре*)

**МАХ** *м* **1.** (*взмах*) һелтәү, ҡағыу, елпеү; **мах крыла́** ҡанат елпеүе; **мах руко́й** ҡул һелтәүе **2.** (*оборот*) әйләнеш; **мах колеса́** тәгәрмәс әйләнеше **3.** (*шаг животного*) аҙым; **широ́кий мах ло́шади** аттың киң аҙымы ♦ **с ма́ху**: 1) бер һелтәүҙә (ынтылыуҙа); 2) бар көскә; 3) уйлап тормайынса, кинәт; **дать ма́ху** һынатыу

**МАХАО́Н** *м* махаон (*ҙур сыбар күбәләк*)

**МАХА́ТЬ** *несов. чем* һелтәү, болғау, ҡағыу, елпеү; **маха́ть са́блей** ҡылыс һелтәү; **маха́ть платко́м** яулыҡ болғау; **маха́ть кры́льями** ҡанат ҡағыу

**МАХО́РКА** *ж* махорка

**МАХО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое махорка ...ы; **махо́рочный дым** махорка төтөнө

**МАХРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялбыр, ҡатмарлы таж япраҡлы; **махро́вая а́стра** ҡатмарлы таж япраҡлы астра **2.** *перен.* (*отъявленный*) һөрһөгән, бысылдап торған; **махро́вый реакционе́р** һөрһөгән реакционер **3.** (*о ткани*) йөнтәҫ, ялбыр; **махро́вое полоте́нце** йөнтәҫ таҫтамал

**МА́ЧЕХА** *ж* үгәй әсә (инә)

**МА́ЧТА** *ж* мачта; **ма́чта корабля́** карап мачтаһы

**МА́ЧТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мачта ...ы; **ма́чтовый ого́нь** мачта уты **2.** мачталыҡ, мачтаға яраҡлы; **ма́чтовая сосна́** мачталыҡ ҡарағай

**МАШИ́НА** *ж* машина; **легкова́я маши́на** еңел машина; **грузова́я маши́на** йөк машинаһы

**МАШИНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уйламайынса, тиҙ-тиҙ (генә), ихтыярһыҙ; **машина́льный отве́т** уйламайынса әйтелгән яуап

**МАШИНИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **машинизи́ровать**

**МАШИНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* машиналар менән тәьмин итеү; **машинизи́ровать се́льское хозя́йство** ауыл хужалығын машиналар менән тәьмин итеү

**МАШИНИ́СТ** *м* машинист; **машини́ст по́езда** поезд машинисы

**МАШИНИ́СТКА** *ж* машинистка (*яҙыу машинкаһында эшләгән ҡатын-ҡыҙ*)

**МАШИ́НКА** *ж* **1.** *уменьш. от* **маши́на** **2.** (*прибор*) машинка; **пи́шущая маши́нка** яҙыу машинкаһы; **маши́нка для стри́жки воло́с** сәс алыу машинкаһы

**МАШИ́ННО-ТРА́КТОРНЫЙ,** -ая, -ое машина-трактор ...ы; **маши́нно-тра́кторная ста́нция** машина-трактор станцияһы

**МАШИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** машина ...ы; **маши́нное ма́сло** машина майы; **маши́нные ча́сти** машина частары **2.** машина ярҙамында (менән); **маши́нная вя́зка** машина ярҙамында бәйләү ♦ **маши́нный перево́д** машина тәржемәһе

**МАШИНОПИ́СНЫЙ,** -ая, -ое машинкала баҫылған; **машинопи́сный текст** машинкала баҫылған текст

**МАШИ́НОПИСЬ** *ж* **1.** *уст.* машинкала баҫыу; **ку́рсы маши́нописи** машинкала баҫырға өйрәнеү курстары **2.** машинка яҙыуы (тексы)

**МАШИНОСТРОЕ́НИЕ** *с* эшләп сығарыу, машина(лар) эшләү; **тяжёлое машинострое́ние** ауыр машиналар эшләү

**МАШИНОСТРОИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое машиналар төҙөү (эшләү) ...ы; **машинострои́тельное объедине́ние** машиналар эшләү берекмәһе

**МАЭ́СТРО** *м нескл.* маэстро (*атаҡлы композитор, дирижёр, рәссам, шахматсы һ.б. әйтелгән маҡтаулы исем*)

**МАЯ́К** *м*; *прям., перен.* маяҡ; **огни́ маяка́** маяҡ уттары; **маяки́ труда́** хеҙмәт маяҡтары

**МА́ЯТНИК** *м* маятник, тел; **часово́й ма́ятник** сәғәт теле

**МА́ЯТНИКОВЫЙ,** -ая, -ое маятниклы; **ма́ятниковые часы́** маятниклы сәғәт ♦ **ма́ятниковый прибо́р** *физ.* маятниклы прибор

**МА́ЯТЬСЯ** *несов.*; *разг.* интегеү, ғазапланыу, яфаланыу, этләнеү; **ма́яться от тяжёлой рабо́ты** ауыр эштән интегеү; **ма́яться, не зна́я, как нача́ть разгово́р** нисек һүҙ башлап ебәрергә белмәйенсә яфаланыу; **ма́яться живото́м** эс ауыртыуҙан интегеү

**МАЯ́ЧИТЬ** *несов.*; *разг.* йыраҡтан күренеү, (әллә ҡайҙан) күренеп тороу (ятыу), ҡараҫҡыланып күренеү

**МАЯ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое маяҡ ...ы; **мая́чный ого́нь** маяҡ уты

**МГЛА** *ж* **1.** (*пелена*) монар, томан **2.** (*темнота*) ҡараңғылыҡ; **ночна́я мгла** төнгө ҡараңғылыҡ

**МГЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое монарлы, томанлы; **мгли́стое у́тро** томанлы иртә

**МГНОВЕ́НИЕ** *с* күҙ асып йомған ара, бик ҡыҫҡа (аҙ) ғына ваҡыт; **замолча́ть на мгнове́ние** бик аҙға тынып ҡалыу ♦ **в одно́ мгнове́ние** күҙ асып йомған арала; **в мгнове́ние о́ка** күҙ асып йомғансы

**МГНОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое (бик) тиҙ -ған/-гән, кинәт була торған; **мгнове́нное реше́ние** бик тиҙ табылған яуап; **мгнове́нная оби́да** тиҙ генә бөтөп китә (үтә) торған үпкә

**МЕ́БЕЛЬ** *ж собир.* мебель, йорт йыһазы

**МЕ́БЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мебель ...ы, йорт йыһазы ...ы; **ме́бельный магази́н** мебель магазины

**МЕ́БЕЛЬЩИК** *м* мебель яһаусы (оҫтаһы)

**МЕБЛИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **меблирова́ть** **2.** *прил.* мебелле, йыһазлы; **меблиро́ванные ко́мнаты** йыһазлы бүлмәләр

**МЕБЛИРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* мебелләү, мебель ҡуйыу, йыһазлау; **меблирова́ть кварти́ру** фатирҙы йыһазлау

**МЕБЛИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **меблирова́ть** **2.** *собир.* (*мебель, обстановка*) мебель, йыһаз; **стари́нная меблиро́вка** боронғо мебель

**МЕГАФО́Н** *м* мегафон (*тауыш көсәйткес*)

**МЕД...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "медицина" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.,* **медпу́нкт** медпункт; **медрабо́тник** медицина хеҙмәткәре

**МЁД** *м* бал; **ли́повый мёд** йүкә балы; **хмельно́й мёд** әсе бал ♦ **не мёд** *в знач. сказ.* майлы бутҡа түгел

**МЕДАЛИ́СТ** *м* и **МЕДАЛИ́СТКА** *ж* медалист; **выпускни́к-медали́ст** уҡыуҙы тамамлаусы медалист; **хоккеи́сты-медали́сты** медалист-хоккейсылар, миҙаллы хоккейсылар

**МЕДА́ЛЬ** *ж* миҙал; **награди́ть меда́лью** миҙал менән бүләкләү

**МЕДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое миҙал ...ы; **меда́льная ле́нта** миҙал таҫмаһы

**МЕДАЛЬО́Н** *м* медальон; **носи́ть медальо́н** медальон тағып йөрөү

**МЕДВЕ́ДИЦА** *ж* инә айыу

**МЕДВЕ́ДКА** *ж* айыуғорт, ер сиңерткәһе

**МЕДВЕ́ДЬ** *м* **1.** айыу; **бе́лый медве́дь** аҡ айыу **2.** *разг.* айыу (*ауыр кәүҙәле кешегә ҡарата*); **эй, медве́дь, на́ ногу наступи́л же** эй, айыу, аяҡҡа баҫтың даһа ♦ **медве́дь на́ ухо наступи́л** *кому; шутл.* көй-моңға һәләте юҡ, көй-моңо юҡ

**МЕДВЕЖА́ТИНА** *ж* айыу ите

**МЕДВЕ́ЖИЙ,** -ья, -ье **1.** айыу ...ы; **медве́жья ла́па** айыу табаны **2.** айыу(ҙан), айыу тиреһенән; **медве́жья шу́ба** айыу тун **3.** *перен.* айыуҙай,

айыу кеүек, айыуға хас; **медве́жья фигу́ра** айыуҙай кәүҙә ♦ **медве́жий у́гол** алыҫ урын, төпкөл урын

**МЕДВЕЖО́НОК** *м* айыу балаһы

**МЕДВЯ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** бал еҫле; **медвя́ный арома́т** баллы хуш еҫ **2.** баллы, балдан (эшләнгән); **медвя́ный напи́ток** баллы эсемлек ♦ **медвя́ная роса́** *бот.* татлы ысыҡ, бал ысығы

**МЕДЕПЛАВИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое баҡыр иретеү ...ы; **медеплави́льная печь** баҡыр иретеү мейесе

**МЕДЕПЛАВИ́ЛЬЩИК** *м* баҡыр иретеүсе

**МЕДЖЛИ́С** *м* мәжлес (*Иранда, Төркиәлә закондар сығарыу органы, парламент*)

**МЕДИА́НА** *ж*; *мат.* медиана

**МЕДИА́ТОР** *м* медиатор (*ҡыллы музыка ҡоралдарын сиртеп уйнау өсөн йоҡа пластинка*); **костяно́й медиа́тор** һөйәк медиатор

**МЕ́ДИК** *м* медик

**МЕДИКАМЕНТО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое дарыуҙар менән (ҡулланып); **медикаменто́зное лече́ние** дарыуҙар ҡулланып дауалау

**МЕДИКАМЕ́НТЫ** *мн.* (*ед.* **медикаме́нт** *м*) медикамент, дарыу

**МЕ́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое баҡырлы; **ме́дистая сталь** баҡырлы ҡорос

**МЁДИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* бал бирә торған, баллы; **мёдистые цветы́** баллы сәскәләр

**МЕДИЦИ́НА** *ж* медицина; **эксперимента́льная медици́на** эксперименталь медицина

**МЕДИЦИ́НСКИЙ,** -ая, -ое медицина ...ы; **медици́нский факульте́т** медицина факультеты

**МЕ́ДЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** яй, аҡрын, талғын; **ме́дленное тече́ние реки́** йылғаның талғын ағышы **2.** оҙаҡ, оҙаҡҡа һуҙылған; **ме́дленный путь от безызве́стности до сла́вы** билдәһеҙлектән бөйөклөккә алып барыусы оҙаҡҡа һуҙылған юл ♦ **на ме́дленном огне́** тандыр утта

**МЕДЛИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* аҡрынлыҡ, әкренлек, һүлпәнлек, һалмаҡлыҡ; **медли́тельность ре́чи** һөйләүҙең һалмаҡлығы

**МЕДЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аҡрын, әкрен, һүлпән, яй, мыштыр; **медли́тельные движе́ния** аҡрын хәрәкәттәр; **медли́тельный челове́к** мыштыр кеше

**МЕ́ДЛИТЬ** *несов.* ашыҡмау, оҙаҡлау, оҙаҡҡа һуҙыу, мыштырлау; **ме́длить с реше́нием пробле́мы** мәсьәләне хәл итеүҙе оҙаҡҡа һуҙыу

**МЕ́ДНИК** *м* баҡырсы (*эшсе*)

**МЕ́ДНО-КРА́СНЫЙ,** -ая, -ое баҡыр төҫ, ҡыҙғылт һары, ерән; **ме́дно-кра́сные во́лосы** ерән сәс

**МЕДНОЛИТЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое баҡыр ҡойоу ...ы; **меднолите́йный цех** баҡыр ҡойоу цехы

**МЕДНОЛО́БЫЙ,** -ая, -ое *разг.* туңбаш, кәбәнбаш

**МЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баҡыр ...ы; **ме́дный сли́ток** баҡыр ҡойолмаһы **2.** баҡырлы; **ме́дная руда́** баҡырлы мәғдән **3.** баҡыр, баҡырҙан (эшләнгән); **ме́дные де́ньги** баҡыр аҡсалар; **ме́дная посу́да** баҡыр һауыт **4.** *перен.* (*напоминающий звук от удара по меди — о голосе*) яңғырауыҡлы, көслө (ҡолаҡ ярғыс) тауыш **5.** (*о цвете*) баҡыр төҫлө, ерән, ҡыҙғылт һары; **ме́дный ме́сяц** ҡыҙғылт һары ай ♦ **ме́дный век** *археол.* баҡыр быуаты (*беренсе башлап металдан эшләнгән әйберҙәр барлыҡҡа килгән осор*); **ме́дный лоб** туңбаш (*тиҫкәре, аңра кешегә ҡарата*)

**МЕДОВА́Р** *м* бал ҡойоусы

**МЕДОВАРЕ́НИЕ** *с* бал ҡойоу

**МЕДО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бал ...ы; **медо́вые со́ты** бал кәрәҙе **2.** баллы; **медо́вый пря́ник** баллы перәник **3.** (*с запахом мёда*) бал еҫле, хуш еҫле; **медо́вые цветы́** бал еҫле сәскәләр **4.** *перен.* сөсө; **медо́вые слова́** сөсө һүҙҙәр ♦ **медо́вый ме́сяц** баллы ай (*өйләнешкәндән һуң беренсе ай*)

**МЕДОГО́НКА** *ж* бал ҡыуғыс, бал һурҙырғыс

**МЕДОНО́С** *м* бал биргән үҫемлек

**МЕДОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баллы, бал биргән; **медоно́сные цветы́** баллы сәскәләр **2.** бал ...ы; **медоно́сные пчёлы** бал ҡорттары

**МЕДОСБО́Р** *м*; *пчел.* **1.** йыйылған бал **2.** бал йыйыу осоро; **наступи́ло вре́мя медосбо́ра** бал йыйыу осоро килеп етте

**МЕДОСМО́ТР** *м* медицина тикшереүе; **пройти́ медосмо́тр** медицина тикшереүен үтеү

**МЕДОТОЧИ́ВЫЙ,** -ая, -ое татлы (сөсө) телле, татлы, сөсө; **медоточи́вая речь** сөсө телмәр; **медоточи́вые слова́** татлы һүҙҙәр

**МЕДРЕСЕ́** *с нескл.* мәҙрәсә

**МЕДСЕСТРА́** *ж* медсестра, шәфҡәт туташы; **обрати́ться к медсестре́** медсестраға мөрәжәғәт итеү

**МЕДУ́ЗА** *ж* медуза (*диңгеҙ тереклеге*)

**МЕДУНИ́ЦА** *ж* кәкүк баш, кәкүк емеше

**МЕДЬ** *ж* **1.** (*химический элемент, металл*) баҡыр; **пла́вить медь** баҡыр иретеү **2.** *собир.* (*медные изделия*) баҡыр әйберҙәр; **медь орке́стра** оркестрҙың баҡыр инструменттары **3.** *собир.*; *разг.* баҡыр аҡса; **в карма́не одна́ медь** кеҫәлә тик баҡыр аҡсалар ғына

**МЕДЯ́К** *м*; *разг.* баҡыр аҡса

**МЕДЯНИ́ЦА** *ж* **1.** баҡыр кеҫәртке (*аяҡһыҙ кеҫәртке алмағаста һәм армытта*) **2.** (*насекомое*) япраҡ бөрсәһе (ҡуңыҙы)

**МЕДЯ́НКА** *ж* **1.** *зоол.* баҡыр (еҙ, тос) йылан **2.** (*краска*) йәшел буяу

**МЕЖ** *предлог см.* **ме́жду**

**МЕЖ...** *см.* **между...**

**МЕЖА́** *ж* межа, ыҙан; **пройти́ по меже́** ыҙан буйлап барыу

**МЕЖБИБЛИОТЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое китапханалар араһындағы; **межбиблиоте́чный абонеме́нт** китапханалар араһындағы абонемент

**МЕЖБРО́ВЬЕ** *с* ике ҡаш араһы

**МЕЖВЕ́ДОМСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *см.* **междуве́домственный**

**МЕЖВИДОВО́Й,** -ая, -ое *биол.* төр-ара, төрҙәр араһындағы; **межвидово́е скре́щивание** төрҙәр араһында һеркәләнеү

**МЕЖДОМЕ́ТИЕ** *с*; *грам.* ымлыҡ

**МЕЖДОУСО́БИЕ** *с* и **МЕЖДОУСО́БИЦА** *ж* үҙ-ара талаш (низағ, ғауға)

**МЕЖДОУСО́БНЫЙ: междоусо́бные во́йны** үҙ-ара һуғыштар (талаштар)

**МЕ́ЖДУ** и **МЕЖ** *предлог с твор.* и *род. п.* араһы, араһына, араһында, араһындағы, араһынан; **стать ме́жду две́рью и окно́м** ишек менән тәҙрә араһына баҫыу; **находи́ться ме́жду шко́лой и магази́ном** мәктәп менән магазин араһында булыу; **тропа́ ме́жду гор** тауҙар араһындағы һуҡмаҡ; **пройти́ ме́жду дома́ми** йорттар араһынан үтеү ♦ **ме́жду двух огне́й** ике ут араһында; **ме́жду де́лом** эш араһында, бушаған арала; **ме́жду жи́знью и сме́ртью** үлем менән йәшәү араһында; бик ауыр, ҡурҡыныс хәлдә; **ме́жду не́бом и землёй**: 1) йорт-ерһеҙ (йәшәү, тороп ҡалыу); 2) билдәһеҙ хәлдә (булыу, ҡалыу), ер менән күк араһында; **ме́жду на́ми говоря́** *в знач. вводн. сл.* үҙ-ара ғына әйткәндә; **ме́жду про́чим**: 1) (*попутно*) былай ғына; 2) (*кстати*) һүҙ араһында (яйы килгәндә, һүҙ ыңғайында) әйткәндә; **ме́жду тем** шул арала (саҡта, ваҡытта); **а ме́жду тем** *противит. союз* ысындан да, дөрөҫөндә; **ме́жду тем как** *сопост. союз* шул уҡ ваҡытта

**МЕЖДУ...** и **МЕЖ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ара", "араһы", "араһындағы" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **междуго́рье** ике тау араһы; **междуре́чный** ике йылға араһындағы

**МЕЖДУВЕ́ДОМСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ведомстволар араһындағы; **междуве́домственная перепи́ска** ведомстволар араһындағы яҙышыу

**МЕЖДУГОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡала-ара; **междугоро́дная связь** ҡала-ара бәйләнеш

**МЕЖДУНАРО́ДНИК** *м*; *разг.* халыҡ-ара сәйәсәт белгесе

**МЕЖДУНАРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое халыҡ-ара; **междунаро́дное положе́ние** халыҡ-ара хәл

**МЕЖДУРЕ́ЧЬЕ** *с* ике йылға араһы

**МЕЖДУРЯ́ДЬЕ** *с*; *с.-х.* рәттәр араһы

**МЕЖЕВА́НИЕ** *с см.* **межева́ть**, **межева́ться**

**МЕЖЕВА́ТЬ** *несов. что* межалау, межа ярыу, ыҙан һалыу, ыҙанлау, ыҙанлатыу; **межева́ть леса́** урмандарҙы межалау

**МЕЖЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** межа һалыныу, межаланыу, ыҙанлатыу, бүленеү **2.** *страд. от* **межева́ть**

**МЕЖЕВО́Й,** -ая, -ое межа ...ы, ыҙан ...ы; **межевы́е столбы́** межа бағаналары

**МЕЖЗАВОДСКО́Й** и *уст.* **МЕЖЗАВО́ДСКИЙ,** -ая, -ое завод-ара; **межзаводски́е соревнова́ния** завод-ара ярыштар

**МЕЖЗВЁЗДНЫЙ,** -ая, -ое йондоҙҙар араһындағы; **межзвёздные простра́нства** йондоҙҙар араһындағы киңлектәр

**МЕЖКЛЕ́ТОЧНЫЙ** и **МЕЖКЛЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *биол.* күҙәнәктәр араһындағы; **межкле́точное вещество́** күҙәнәктәр араһындағы матдә

**МЕЖКОЛХО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое колхоз-ара; **межколхо́зная гидроста́нция** колхоз-ара гидростанция

**МЕЖКОНТИНЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое континент-ара; **межконтинента́льная баллисти́ческая раке́та** континент-ара баллистик ракета

**МЕЖНАЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое милләт-ара; **межнациона́льные свя́зи** милләт-ара бәйләнештәр

**МЕЖПЛАНЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое планета-ара; **межплане́тный перелёт** планета-ара осоу

**МЕЖПОЗВОНО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* умыртҡа һөйәктәре араһындағы; **межпозвоно́чные отве́рстия** умыртҡа һөйәктәре араһындағы тишектәр

**МЕЖРАЙО́ННЫЙ,** -ая, -ое район-ара; **межрайо́нная организа́ция** район-ара ойошма

**МЕЖРЁБЕРНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* ҡабырғалар араһындағы; **межрёберные мы́шцы** ҡабырғалар араһындағы мускулдар

**МЕЖХОЗЯ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое хужалыҡ-ара; **межхозя́йственные свя́зи** хужалыҡ-ара бәйләнештәр

**МЕЗГА́** *ж* мезга, күшкә (*йәш ағас ҡабығының эске йомшаҡ ҡатламы*)

**МЕЗОНИ́Н** *м* мезонин, осортма, сарлаҡ

**МЕКСИКА́НСКИЙ,** -ая, -ое мексикан ...ы, Мексика ...ы; **мексика́нские пе́сни** мексикан йырҙары

**МЕКСИКА́НЦЫ** *мн.* мексикандар, мексикан халҡы // *ед.* **мексика́нец** *м* мексикан ир-аты; **мексика́нка** *ж* мексикан ҡатын-ҡыҙы

**МЕЛ** *м* аҡбур, бур

**МЕЛА́НЖ** *м*; *спец.* меланж, сыбар туҡыма (*еп*)

**МЕЛАНХО́ЛИК** *м* меланхолик (*өмөтһеҙлеккә, күңелһеҙ уйҙарға, төшөнкөлөккә бирелеүсән кеше*)

**МЕЛАНХОЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** меланхолик; **меланхоли́ческий темпера́мент** меланхолик темперамент **2.** меланхолик, күңелһеҙлеккә (төшөнкөлөккә) бирелгән, күңелһеҙ, ҡайғылы, моңло; **меланхоли́ческий вид** күңелһеҙ ҡиәфәт; **меланхоли́ческая пе́сня** моңло йыр

**МЕЛАНХО́ЛИЯ** *ж* (*хандра, тоска*) меланхолия, күңел төшөнкөлөгө, эс бошоу, бойоҡлоҡ

**МЕЛЕ́ТЬ** *несов.* һайығыу; **меле́ют ре́ки** йылғалар һайыға

**МЕЛИОРАТИ́ВНЫЙ** и **МЕЛИОРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое мелиорация ...ы; **мелиорати́вные рабо́ты** мелиорация эштәре

**МЕЛИОРА́ТОР** *м* мелиоратор, мелиорация белгесе

**МЕЛИОРА́ЦИЯ** *ж* мелиорация (*һаҙлыҡтарҙы киптереү, ҡоро ерҙәрҙе һуғарыу эштәре*); **мелиора́ция заболо́ченных земе́ль** һаҙамыҡ ерҙәр мелиорацияһы

**МЕЛИОРИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* мелиорациялау

**МЕЛИ́ССА** *ж* мелисса (*үлән*)

**МЕЛИ́ТЬ** *несов. что* аҡбур менән ышҡыу, (ағартыу) аҡбур һөртөү; **мели́ть пу́говицы** төймәләрҙе аҡбур менән ағартыу

**МЕ́ЛКИЙ,** -ая, -ое **1.** ваҡ, бәләкәй; **ме́лкий песо́к** ваҡ ҡом **2.** ваҡ; **ме́лкая буржуази́я** ваҡ буржуазия; **ме́лкий со́бственник** ваҡ милексе **3.** бәләкәй, ваҡ-төйәк; **ме́лкие ро́ли в спекта́кле** спектаклдәге ваҡ-төйәк ролдәр **4.** *перен.* түбән, алама; **ме́лкая душа́** түбән (ваҡ) кеше **5.** һай; **ме́лкая река́** һай йылға; **ме́лкая па́хота** һай һөрөү ♦ **ме́лкие де́ньги** ваҡ аҡса; **ме́лким бе́сом рассыпа́ться** *перед кем* ярамһаҡланыу, тәрилкә тотоу; **ме́лкая со́шка** абруйһыҙ (бәләкәй) кеше

**МЕ́ЛКО 1.** *нареч.* ваҡ; **ме́лко коло́ть са́хар** шәкәрҙе ваҡ итеп ватыу **2.** *в знач. сказ., безл.* һай; **здесь ме́лко** был урында һай ♦ **ме́лко пла́вать** һай йөҙөү (*эштә һәләтһеҙ булыу*)

**МЕЛКО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ваҡ", "һай", "бәләкәй" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **мелкопло́дный** ваҡ емешле; **мелководный** һай һыулы

**МЕЛКОБУРЖУА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое ваҡ буржуаз; **мелкобуржуа́зные сло́и** ваҡ буржуаз ҡатламдар

**МЕЛКОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое һай, һыуы һай; **мелково́дная река́** һай йылға

**МЕЛКОВО́ДЬЕ** *с* һай урын

**МЕЛКОДО́ННЫЙ,** -ая, -ое һай, төбө һай; **мелкодо́нная ло́дка** һай кәмә

**МЕЛКОЗЕРНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ваҡ орлоҡло (бөртөклө, төйөрлө); **мелкозерни́стая пшени́ца** ваҡ (орлоҡло) бойҙай; **мелкозерни́стая по́чва** ваҡ төйөрлө тупраҡ

**МЕЛКОКАЛИ́БЕРНЫЙ,** -ая, -ое бәләкәй калибрлы; **мелкокали́берная винто́вка** бәләкәй калибрлы винтовка

**МЕЛКОЛЕ́СЬЕ** *с* ваҡ урманлыҡ

**МЕЛКОЛИ́СТВЕННЫЙ** и **МЕЛКОЛИ́СТНЫЙ,** -ая, -ое ваҡ япраҡлы; **мелколи́ственные дере́вья** ваҡ япраҡлы ағастар; **мелколи́стная ли́па** ваҡ япраҡлы йүкә

**МЕЛКОТА́** *ж*; *разг.* ваҡ-төйәк, ыбыр-сыбыр, ваҡ заттар (нәмәләр)

**МЕЛКОТОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое ваҡ тауар ...ы; **мелкотова́рное хозя́йство** ваҡ тауар хужалығы

**МЕЛКОТРА́ВЧАТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *уст.* ваҡ (үлән һымаҡ) биҙәкле, сыбар **2.** *разг., пренебр.* бәләкәй вазифалы; **мелкотра́вчатый челове́к** бәләкәй вазифалы кеше

**МЕЛКОШЁРСТНЫЙ** и **МЕЛКОШЁРСТЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа йөнлө; **мелкошёрстная овца́** ҡыҫҡа йөнлө һарыҡ

**МЕЛОВО́Й,** -ая, -ое **1.** аҡбур ...ы; **мелові́ые го́ры** аҡбур тауҙары **2.** аҡбурлы; **мелова́я по́чва** аҡбурлы тупраҡ **3.** аҡбур төҫлө (кеүек) аҡ; **гу́бы его́ ста́ли мелові́ыми** уның ирендәре аҡбур төҫлө аҡ ♦ **мелова́я бума́га**; **мело́ванная бума́га** ағартылған ҡағыҙ; **мелово́й пери́од** *геол.* аҡбур дәүере

**МЕЛОДЕКЛАМА́ЦИЯ** *ж* мелодекламация (*музыкаға ҡушылып декламация һөйләү*)

**МЕЛО́ДИКА** *ж*; *иск.* мелодика (*көйҙәр тураһында тәғлимәт*)

**МЕЛОДИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** мелодик; **мелоди́ческое строе́ние пе́сни** йырҙың мелодик төҙөлөшө **2.** *см.* **мелоди́чный**

**МЕЛОДИ́ЧНОСТЬ** *ж* моңлолоҡ, аһәңлек, көйлөлөк, яғымлылыҡ; **мелоди́чность пе́сни** йырҙың моңлолоғо

**МЕЛОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое моңло, аһәңле, яғымлы; **мелоди́чный напе́в** моңло көй; **мелоди́чный го́лос** яғымлы (моңло) тауыш

**МЕЛО́ДИЯ** *ж* көй, моң, аһәң

**МЕЛОДРА́МА** *ж* мелодрама (**1.** *сәхнә күренештәре музыка, йыр менән барған әҫәр* **2.** *хис-тойғоларҙы һүрәтләүсе эмоциональ драма жанры* **3.** *үҙенде артыҡ нык ҡайғылы, ҡыҙғаныс итеп күрһәтеүсе яһалма хистәргә ҡарата*)

**МЕЛОДРАМАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** мелодрама ...ы; **мелодрамати́ческий сюже́т** мелодрама сюжеты **2.** мелодраматик, артыҡ эмоциялы; **мелодрамати́ческий вид** мелодраматик төҫ

**МЕЛО́К** *м* аҡбур киҫәге

**МЕЛОМА́Н** *м* меломан (*музыка һәм йыр һөйөүсе*)

**МЕЛОМА́НИЯ** *ж* меломания (*музыка һәм йырға артыҡ әүәҫлек*)

**МЕ́ЛОЧНОСТЬ** *ж* ваҡлыҡ, ваҡсыллыҡ

**МЕ́ЛОЧНЫЙ** и **МЕЛОЧНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*основанный на мелочах*) ваҡ, әһәмиәтһеҙ, ваҡ-төйәккә нигеҙләнгән; **ме́лочные инте́ресы** ваҡ мәнфәғәттәр **2.** (*придающий значение пустякам*) ваҡсыл, иҫәпсел; **ме́лочный челове́к** ваҡсыл кеше

**МЕ́ЛОЧЬ** *ж* **1.** (*мелкие вещи*) ваҡ нәмә, ваҡ-төйәк; **магази́н мелоче́й** ваҡ-төйәк магазины **2.** *собир.* (*мелкие деньги*) ваҡ аҡса **3.** (*пустяк*) ваҡ-төйәк, әһәмиәтһеҙ (буш) нәмә, юҡ-бар (нәмә); **ме́лочи бы́та** тормоштоң ваҡ-төйәге

**МЕЛЬ** *ж* һай, һайлыҡ, һай урын; **вы́йти на мель** һайға сығыу ♦ **сиде́ть на мели́** кәмә ҡомға терәлеү

**МЕЛЬКА́НИЕ** *с см.* **мелька́ть**

**МЕЛЬКА́ТЬ** *несов.* **1.** күренеп (сағылып) ҡалыу; **бе́лое пла́тье мелька́ет ме́жду дере́вьями** аҡ күлдәк ағастар араһынан күренеп ҡала **2.** (*мерцать*) йымылдау, йым-йым итеү; **вдали́ мелька́ют огни́** алыҫта уттар йымылдай **3.** *перен.* уйға килеү, башҡа килеү; **иногда́ мелька́ет**

**мысль о переéзде** ҡайһы ваҡыт күсеп китеү тураһында уй башҡа килеп ҡуя ♦ **в глазáх мелькáет** күҙ алды семәрләнә

**МЕЛЬКНУ́ТЬ** *сов. см.* **мелькáть**

**МЕ́ЛЬКОМ** *нареч.* **1.** тиҙ генә, аҙға ғына, ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына; **повидáться мéльком** аҙға ғына осрашыу **2.** өҫтән генә, унан-бынан ғына, саҡ-саҡ ҡына, ситләтеп кенә, осраҡлы ғына; **слы́шать мéльком** саҡ-саҡ ҡына ишетә биреп ҡалыу

**МЕ́ЛЬНИК** *м* тирмәнсе

**МЕ́ЛЬНИЦА** *ж* тирмән; **водянáя мéльница** һыу тирмәне; **ветрянáя мéльница** ел тирмәне; **кофéйная мéльница** кофе тирмәне

**МЕ́ЛЬНИЧИХА** *ж*; *разг.* (*жена мельника*) тирмәнсе ҡатыны

**МЕ́ЛЬНИЧНЫЙ,** -ая, -ое тирмән ...ы; **мéльничные жерновá** тирмән таштары

**МЕЛЬХИÓР** *м* мельхиор (*баҡыр менән никель иретмәһе*)

**МЕЛЬХИÓРОВЫЙ,** -ая, -ое мельхиор ...ы; **мельхиóровый нож** мельхиор бысаҡ

**МЕЛЬЧÁТЬ** *несов.* **1.** (*становиться мельче по размерам*) вағайыу, ваҡланыу; **лес мельчáл** ағастар вағая барҙы **2.** *перен.* мәғәнәһен (әһәмиәтен) юғалтыу, түбәнлеккә төшөү; **мельчáет репертуáр** репертуар әһәмиәтен юғалта бара **3.** һайығыу; **мельчáет рекá** йылға һайыға бара

**МЕЛЬЧИ́ТЬ** *несов. что* **1.** ваҡлау, вағайтыу, онтау; **мельчи́ть кáмни** таштарҙы ваҡлау **2.** *перен.* әһәмиәтен кәметеү, ваҡлау; **мельчи́ть óбраз** образдың әһәмиәтен кәметеү

**МЕЛЮЗГÁ** *ж собир.*; *разг.* **1.** ыбыр-сыбыр, ваҡ бала-саға, ваҡ-төйәк хайуандар; **в сачкé однá мелюзгá** йәтмәлә тик ваҡ балыҡтар ғына **2.** *перен.* бәләкәй вазифалы, әһәмиәтһеҙ (дәрәжәһеҙ) кешеләр; **канцеля́рская мелюзгá** кәнсәләрҙең бәләкәй вазифалы кешеләре

**МЕМБРÁНА** *ж*; *физ.*, *тех.* мембрана (*тирбәлә торған ҡаты яры йәки йоҡа пластинка*)

**МЕМОРÁНДУМ** *м* меморандум (*мөһим мәсьәләгә ҡарата хөкүмәттең ҡарашын белдереүсе дипломатик документ*); **состáвить меморáндум** меморандум төҙөү

**МЕМОРИÁЛ** *м* мемориал (**1.** *бөйөк кеше йәки ҙур тарихи ваҡиға иҫтәлегенә бағышланған архитектура ҡоролмаһы* **2.** *атаҡлы спортсы хөрмәтенә үткәрелә торған спорт ярыштары*)

**МЕМОРИÁЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мемориаль; **мемориáльная доскá** мемориаль таҡта; **мемориáльный кóмплекс** мемориаль комплекс

**МЕМУАРИ́СТ** *м* мемуарсы, мемуар авторы

**МЕМУÁРНЫЙ,** -ая, -ое мемуар; **мемуáрная литератýра** мемуар әҙәбиәт

**МЕМУÁРЫ** *только мн.* мемуар (*автор үҙе үргән һәм ишеткән ваҡиғалар тураһында яҙмалар*); **воéнные мемуáры** хәрби мемуар

**МЕ́НА** *ж* алмашыу, алмаштырыу, алышыу, алыштырыу; **мéна продýктов на одéжду** аҙыҡ-түлекте кейемгә алмаштырыу

**МЕ́НЕДЖЕР** *м* менеджер (**1.** *сәнәғәт, сауҙа һ.б. төрлө предприятиела ялланған управляющий* **2.** *сәнәғәттә һ.б. өлкәлә етәкселек итеү, ойоштороу мәсьәләләре буйынса белгес*)

**МЕ́НЕЕ** *сравн. ст. от* **мáло** әҙерәк, кәмерәк; **мéнее двух тонн** ике тоннанан кәмерәк; **мéнее чáса** сәғәттән әҙерәк ♦ **мéнее всегó** барынан бигерәк; **не мéнее вáжно** шулай уҡ әһәмиәтле; **тем не мéнее** шуға ҡарамаҫтан

**МЕНЗУ́РКА** *ж* мензурка; **измéрить лекáрство мензýркой** дарыуҙы мензурка менән үлсәү

**МЕНИНГИ́Т** *м*; *мед.* менингит (*мейе ҡабығының шешеүе*)

**МЕНОВÓЙ,** -ая, -ое алмашыу ...ы; **меновáя стóимость** алмашыу хаҡы

**МЕНСТРУÁЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күрем ...ы; **менструáльный периóд** күрем ваҡыты

**МЕНСТРУÁЦИЯ** *ж* күрем

**МЕНСТРУИ́РОВАТЬ** *несов.* күрем күреү (килеү)

**МЕНТÓЛ** *м* ментол (*бөтнөк еҫе килгән төҫһөҙ матдә*)

**МЕНТÓЛОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ментол ...ы; **ментóловое произвóдство** ментол эшләп сығарыу (етештереү) **2.** ментоллы; **ментóловая мазь** ментоллы май

**МЕНУЭ́Т** *м* менуэт (*боронғо француз бейеүе һәм шул бейеү ритмындағы музыка*); **менуэ́т Мóцарта** Моцарт менуэты

**МЕ́НЬШЕ** **1.** *сравн. ст. от* **мáлый** I и **мáленький** бәләкәйерәк; **сапоги́ на размéр мéньше** итек бер үлсәмгә бәләкәйерәк **2.** *сравн. ст. от* **мáло** әҙерәк, кәмерәк; **говори́л он мéньше вчерáшнего** ул кисәгенән әҙерәк һөйләне

**МЕНЬШЕВИ́ЗМ** *м*; *полит.* меньшевизм

**МЕНЬШЕВИ́К** *м* меньшевик

**МЕНЬШЕВИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое меньшевик(тар) ...ы, меньшевистик; **меньшеви́стская пáртия** меньшевиктар партияһы; **меньшеви́стские взгля́ды** меньшевистик ҡараш(тар)

**МЕ́НЬШИЙ,** -ая, -ее **1.** *сравн. ст. от* **мáлый** I и **мáленький** бәләкәйерәк, әҙерәк; **мéньшая часть** әҙерәк өлөш(ө) **2.** *превосх. ст. от* **мáлый** I и **мáленький** бәләкәй, бәләкәйерәк, иң бәләкәй, әҙерәк, иң әҙ; **э́то мéньший размéр из тогó, что есть** был булған нәмәләр араһында иң бәләкәй үлсәм **3.** *разг.* бәләкәй, иң бәләкәй; **мéньший сын** бәләкәй ул ♦ **по мéньшей мéре**: 1) кәм (әҙ) тигәндә, иң кәмендә; 2) *в знач. вводн. сл.* һәр хәлдә; **сáмое мéньшее** кәм (әҙ) тигәндә, кәмендә, иң кәмендә

**МЕНЬШИНСТВÓ** *с* кәм, әҙселек; **меньшинствó голосóв** әҙселек тауыш

**МЕНЮ́** *с нескл.* меню; **меню́ за́втрака и обе́да** иртәнге һәм төшкө аштарҙың менюһы

**МЕНЯ́ЛА** *м* аҡса алмаштырыусы, аҡса алмаштырып кәсеп итеүсе

**МЕНЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* алмаштырыу; **меня́ть драгоце́нности на хлеб** затлы нәмәләрҙе икмәккә алмаштырыу **2.** *что* (*разменивать*) ваҡлау, ваҡлатыу; **меня́ть де́ньги** аҡса ваҡлау **3.** *что* үҙгәртеү; **меня́ть убежде́ния** ҡараштарҙы үҙгәртеү

**МЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** алмаш(тыр)ыу, алышыу; **меня́ться кварти́рами** фатир алмаштырыу **2.** алышыныу; **часовы́е меня́ются че́рез час** һаҡсылар берәр сәғәттән алышына **3.** алмашыныу, үҙгәреү; **пого́да меня́ется** һауа торошо үҙгәрә **4.** *страд. от* **меня́ть** ♦ **меняться в лице́** төҫ үҙгәреү (ҡасыу)

**МЕ́РА** *ж* **1.** үлсәм; **ме́ра длины́** оҙонлоҡ үлсәме; **ме́ра ве́са** ауырлыҡ үлсәме **2.** сама; **знать ме́ру** сама белеү **3.** дәрәжә, ҙурлыҡ; **ме́ра вины́** ғәйептең ҙурлығы **4.** эмәл, сара; **приня́ть ме́ры** сара күреү ♦ **без ме́ры** самаһыҙ, артыҡ; **в ме́ру** етерлек кенә, кәрәгенсә генә; **не в ме́ру**; **сверх ме́ры**; **че́рез ме́ру** саманан тыш, самаһыҙ, артыҡ; **ни в ко́ей ме́ре** бер нисек тә, һис тә, берүк; **ни в ко́ей ме́ре не говори́** берүк һөйләй күрмә; **по ме́ре возмо́жности** мөмкин булғанынса, хәлдән килгәнсә; **по ме́ре сил** ҡулдан килгәнсә

**МЕРЁЖА** *ж* йәтмә (*балыҡ тотоу өсөн*)

**МЕРЕ́ЖКА** *ж* мережка (*арҡау ептәрен һурып алып, туҡымаға яһалған биҙәкле селтәр*); **рукава́ в мере́жках** мережкалы еңдәр

**МЕРЕ́ТЬ** *несов.*; *разг.* (*погибать*) ҡырылыу; **мрут как му́хи** себен кеүек ҡырылалар

**МЕРЕ́ЩИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* (*казаться*) булғандай булыу, тойолоу, күҙгә (күренеү) күренгәндәй булыу; **в темноте́ мере́щится свет** ҡараңғыла күҙгә ут күренгәндәй була

**МЕРЗА́ВЕЦ** *м* и **МЕРЗА́ВКА** *ж*; *разг.* ҡәбәхәт

**МЕ́РЗКИЙ,** -ая, -ое **1.** ерәнгес, ҡәбәхәт, хәшәрәт; **ме́рзкий посту́пок** ерәнгес ҡылыныш **2.** бик хөрт, бик насар; **ме́рзкая пого́да** бик насар көн

**МЕ́РЗКО 1.** *нареч.* оятһыҙ (итеп), ерәнгес (итеп), насар, әшәке, хәшәрәт; **ме́рзко смея́ться** оятһыҙ көлөү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* ауыр, насар, ҡыйын, ерәнгес, яман; **на душе́ ме́рзко** күңелгә ҡыйын

**МЕРЗЛОТА́** *ж* туңлыҡ, туңғаҡ, ҡатҡаҡ; **райо́н ве́чной мерзлоты́** мәңге туңлыҡ районы

**МЕРЗЛОТОВЕ́ДЕНИЕ** *с* туң ҡатламдарҙы өйрәнеү ғилеме

**МЁРЗЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** туңған, туң; **мёрзлая земля́** туң ер **2.** *разг.* туңған, өшөгән; **мёрзлые бвощи** өшөгән йәшелсәләр

**МЕРЗЛЯ́К** *м* и **МЕРЗЛЯ́ЧКА** *ж*; *прост.* өшөмтәл, өшөүсән

**МЕРЗЛЯ́ТИНА** *м* и *ж*; *прост.* өшөмтәл, өшөүсән

**МЁРЗНУТЬ** *несов.* **1.** туңыу; **вода́ мёрзнет** һыу туңа **2.** *разг.* туңыу, өшөү; **ру́ки мёрзнут** ҡулдар өшөй

**МЕ́РЗОСТЬ** *ж* ҡәбәхәтлек, әшәкелек, әшәке (ҡәбәхәт, ерәнгес) һүҙ; **говори́ть ме́рзости** әшәке һүҙҙәр әйтеү

**МЕРИДИА́Н** *м*; *геогр.* меридиан ♦ **магни́тный меридиа́н** *см.* **магни́тный**; **небе́сный меридиа́н** *см.* **небе́сный**

**МЕРИДИА́ННЫЙ,** -ая, -ое меридиан ...ы; **меридиа́нная пло́скость** меридиан яҫылығы

**МЕРИДИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *геогр.*, *астр.* меридиан буйынса, меридиональ; **меридиона́льная ли́ния** меридиональ һыҙыҡ

**МЕРИ́ЛО** *с* үлсәм, үлсәү; **мери́ло вре́мени** ваҡыт үлсәүе

**МЕ́РИН** *м* алаша

**МЕРИНО́С** *м* меринос (*йомшаҡ нәҙек йөнлө һарыҡ тоҡомо һәм уның йөнө*)

**МЕРИНО́СОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** меринос ...ы; **мерино́совая шерсть** меринос йөнө **2.** меринос(тан); **мерино́совый плато́к** меринос яулыҡ; **мерино́совая ткань** меринос туҡыма

**МЕРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* үлсәү ...ы; **мери́тельный прибо́р** үлсәү приборы

**МЕ́РИТЬ** и *разг.* **МЕ́РЯТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* үлсәү; **ме́рить уча́сток** участкаҙы үлсәү; **ме́рить температу́ру** температураны үлсәү **2.** үлсәп (кейеп) ҡарау; **ме́рить костю́м** костюм(ды) кейеп ҡарау ♦ **ме́рить на свой арши́н** үҙ аршынның менән үлсәү; **ме́рить глаза́ми (взгля́дом, взо́ром)** *кого* баштан-аяҡ ҡарап сығыу

**МЕ́РИТЬСЯ** и *разг.* **МЕ́РЯТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем-чем* үлсәшеү, һынашыу; **ме́риться си́лами** көс һынашыу **2.** *страд. от* **ме́рить**

**МЕ́РКА** *ж*; *прям.*, *перен.* үлсәм, үлсәү; **сшить по ме́рке** үлсәү буйынса тегеү; **подходи́ть ко всем с одно́й ме́ркой** бөтә кешене бер үлсәм менән үлсәү

**МЕРКАНТИЛИ́ЗМ** *м* меркантилизм (**1.** *икт. XV—XVIII бб. сауҙа буржуазияһының иҡтисади сәйәсәте һәм шул туралағы тәғлимәт* **2.** *кцсм.*, *кит. иҫәп-хисапта ваҡсыллыҡ, үҙ файҙаң өсөн генә тырышыу*); **атмосфе́ра меркантили́зма** меркантилизм атмосфераһы

**МЕРКАНТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** меркантилизм ...ы; **меркант́ильная систе́ма** меркантилизм системаһы **2.** *перен.* иҫәпсел, ваҡсыл, үҙ файҙаһын ҡайғыртҡан; **меркант́ильные интере́сы** үҙ файҙаһын ҡайғыртҡан мәнфәғәттәр

**МЕ́РКЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* тоноҡ; **ме́рклый свет ла́мпы** лампаның тоноҡ яҡтыһы

**МЕ́РКНУТЬ** *несов.*; *прям.*, *перен.* тоноҡланыу, кәмеү; **звёзды ме́ркнут** йондоҙҙар тоноҡлана; **ме́ркнет я́сность ума́** аҡылдың аңлау кимәле кәмей

**МЕРЛУ́ШКА** *ж* илтер (*бәрәс тиреһе*)

**МЕРЛУ́ШКОВЫЙ,** -ая, -ое илтер; **мерлу́шковая ша́пка** илтер бүрек

**МЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалмаҡ, тигеҙ, бер тигеҙ; **идти́ ме́рным ша́гом** тигеҙ аҙым менән атлап барыу **2.** *спец.* үлсәү ...ы; **ме́рная посу́да** үлсәү һауыты

**МЕРОПРИЯ́ТИЕ** *с* сара, әмәл; **профилакти́ческие мероприя́тия** профилактика саралары

**МЕ́РТВЕННОСТЬ** *ж* йәнһеҙлек, төҫө ҡасыу, (йөҙөндә) ҡан эҫәре булмау; **ме́ртвенность лица́** төҫө ҡасып, йөҙөндә ҡан эҫәре булмау

**МЕ́РТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** үлек (мәйет) төҫлө күм-күк, төҫө ҡасҡан; **ме́ртвенная бле́дность** күм-күк булып төҫө ҡасҡан **2.** *перен.* йәнһеҙ, тынып ҡалған, хәрәкәтһеҙ; **ме́ртвенная пустота́** йәнһеҙ бушлыҡ

**МЕРТВЕ́ТЬ** *несов.* **1.** үлеү, һүнеү, тыныу; **мертве́ют глаза́** күҙҙәр һүнә бара **2.** ҡатып ҡалыу; **мертве́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу **3.** (*неметь*) ойоу, ҡатыу; **ру́ки мертве́ют от хо́лода** һыуыҡтан ҡулдар ҡата **4.** *перен.* йәнһеҙләнеү, тынып (хәрәкәтһеҙ) ҡалыу; **в часы́ зно́я всё мертве́ет** томрала бөтә нәмә тынып ҡала

**МЕРТВЕ́Ц** *м* үлек, мәйет

**МЕРТВЕ́ЦКАЯ** *ж*; *разг.* мәйеттәр бүлмәһе, морг

**МЕРТВЕ́ЦКИ: мертве́цки пьян (пья́ный)** *разг.* лаяҡыл иҫерек

**МЕРТВЕЧИ́НА** *ж* **1.** *собир.* үләкһә, емтек **2.** *перен.*, *разг.* бушлыҡ, йәнһеҙлек, рухһыҙлыҡ; **атмосфе́ра мертвечи́ны** бушлыҡ атмосфераһы

**МЕРТВИ́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** үлтереү, һәләк (харап) итеү **2.** *перен.* көсөн алыу, йәнһеҙләндереү, рухын төшөрөү; **боле́знь его́ мертви́т** сир унын көсөн ала

**МЁРТВО** и **МЕРТВО́ 1.** *нареч.* йәнһеҙ, үлек кеүек, туң; **мёртво жить** үлек кеүек йәшәү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* тын, буш, йән эйәһе юҡ; **на у́лице мертво́** урамда йән эйәһе юҡ

**МЕРТВОРОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** үле тыуған **2.** *в знач. сущ.* **мертворождённый** *м* и **мертворождённая** *ж* үле тыуған (малай, ҡыҙ) **3.** *перен.* эшкә ашмаған, кәрәкмәгән; **мертворождённый прое́кт** кәрәкмәгән проект

**МЁРТВЫЙ,** -ая, -ое **1.** үле, йәнһеҙ; **мёртвое те́ло** үле кәүҙә **2.** (*о растениях*) ҡоро, ҡороған; **мёртвые дере́вья** ҡороған ағастар **3.** *перен.* һүнгән, тонҡ; **мёртвые глаза́** һүнгән күҙҙәр; **мёртвый луч** тонҡ нур **4.** *перен.* йәнһеҙ, тын; **мёртвая пусты́ня** тын бушлыҡ **5.** *перен.* файҙаһыҙ, ҡулланылмай торған, буш; **мёртвые зна́ния** файҙаһыҙ белем ♦ **мёртвая вода́** үле һыу, терелтә торған һыу (*экиәттәрҙә*); **мёртвая зыбь** ваҡ тулҡын; **мёртвый капита́л**: 1) *фин.* файҙаһыҙ ятҡан капитал; 2) *перен.* ҡулланылмай торған белем; **мёртвая петля́**: 1) сиселмәҫлек тоҡан (элмәк); 2) юғары пилотаждың бер фигураһы; **мёртвая приро́да** йәнһеҙ тәбиғәт; **мёртвое простра́нство** *воен.* пуля теймәй торған урын; **мёртвый сезо́н** торғонлоҡ (*сауҙала, сәнәғәттә*); **мёртвая то́чка** *тех.* тигеҙләнеш нөктәһе; **мёртвая хва́тка**: 1) (*у собаки*) ысҡындырмаҫлыҡ итеп тешләү; 2) *перен.* эшләмәйенсә ҡалмау, тотҡан ерҙән һындырыу (өҙөп алыу); **мёртвый час** көндөҙгө йоҡо сәғәте; **мёртвый штиль** елһеҙлек (дингеҙҙә); **мёртвый язы́к** үле тел (*яҙма ҡомартҡыларҙа ғына һаҡланған*); **мёртвый я́корь** оҙаҡ ваҡытҡа һалынған якорь; **быть на мёртвой то́чке** бер үк хәлдә (үҙгәрешһеҙ, һаман бер урында) булыу; **лежа́ть мёртвым гру́зом** файҙаһыҙ (ҡулланылмай) ятыу

**МЕРТВЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **мертви́ть 2.** *прил.* һәләк (харап) итеүсе; **мертвя́щий хо́лод** һәләк итеүсе һалҡынлыҡ **3.** *прил.* ауыр, күңелһеҙ, эс бошорғос; **мертвя́щая тишина́** күңелһеҙ тынлыҡ

**МЕРЦА́НИЕ** *с см.* **мерца́ть**

**МЕРЦА́ТЬ** *несов.* **1.** емелдәү, ем-ем итеү; **мерца́ет огонёк** ут емелдәй **2.** *биол.* тирбәлеү, һелкенеү; **мерца́ющие ресни́чки** тирбәлеүсе керпексәләр

**МЕ́СИВО** *с*; *разг.* **1.** иҙмә; **ме́сиво для вы́делки бума́ги** ҡағыҙ яһау (эшләү) өсөн иҙмә **2.** бысраҡ, батҡаҡ; **ме́сиво доро́ги** юл батҡағы **3.** (*корм*) болғау, болғама; **ме́сиво для кур** тауыҡтар өсөн болғау

**МЕСИ́ЛКА** *ж* бутауыс, болғауыс, болғатҡыс

**МЕСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* иҙеү ...ы, баҫыу ...ы; **меси́льный чан** иҙеү киҫмәге

**МЕСИ́ТЬ** *несов. что* иҙеү, баҫыу; **меси́ть те́сто** ҡамыр баҫыу; **меси́ть гли́ну** балсыҡ баҫыу ♦ **меси́ть грязь** батҡаҡты (бысраҡты) ярып барыу, батҡаҡ юлдан барыу

**МЕ́ССА** *ж* месса (*католиктарҙың көндөҙгө ғибәҙәт ҡылыуы*)

**МЕССИ́Я** *м*; *книжн.* мессия (*көтмәгәндә берәй ҡыйынлыҡтан, фажиғәнән, афәттән ҡотҡарыусы*)

**МЕСТА́МИ** *нареч.* урыны менән, ҡайһы бер урындарҙа; **места́ми вы́пал снег** урыны менән ҡар яуған

**МЕСТЕ́ЧКО I** *с*; *уменьш. от* **ме́сто** 1, 4

**МЕСТЕ́ЧКО II** *с* ҙур ауыл (*Украина һәм Белоруссияла*)

**МЕСТИ́** *несов.* **1.** *что* һепереү; **мести́ пол** иҙән һепереү **2.** *что* и *без доп.* (*переносить с места на место*) осороу, һеперeү; **ве́тер метёт ли́стья** ел япрактарҙы осора **3.** *безл.* һепертеү; **в по́ле метёт** ҡырҙа буран һепертә

**МЕСТКО́М** *м* (*местный комитет*) местком (*урындағы комитет*)

**МЕ́СТНИЧЕСТВО** *с* төбәкселек (*дөйөм эшкә зыян килтереп, урындағы тар мәнфәғәттән сығып эш итеү*)

**МЕ́СТНОСТЬ** *ж* **1.** урын, ер; **гори́стая ме́стность** таулы ер **2.** ер, яҡ, төбәк; **се́льская ме́стность** ауыл ере

**МЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урындағы, ерле; **ме́стное населе́ние** урындағы халыҡ; **ме́стный го́вор** ерле һөйләш **2.** айырым урынға хас, бер урында булған, бер урынға ғына бирелгән; **ме́стный нарко́з** бер урынға ғына бирелгән наркоз

**МЕ́СТО** *с* **1.** (*пространство*) урын, ер; **ме́сто рожде́ния** тыуған ер; **ме́сто встре́чи** осрашыу урыны; **в чемода́не бо́льше нет ме́ста** сумаҙанда башҡаса урын юҡ **2.** (*определённое пространство, предназначенное для кого-чего-л.*) урын; **плацка́ртное ме́сто** плацкартлы урын; **рабо́чее ме́сто** эш урыны; **ключи́ вися́т на своём ме́сте** асҡыстар урынында эленеп тора **3.** (*определённое положение, занимаемое кем-л.*) урын; **заня́ть пе́рвое ме́сто** беренсе урын алыу; **заня́ть своё ме́сто** үҙ урынына ултырыу **4.** (*служебное положение*) вазифа, урын; **получи́ть ме́сто инжене́ра** инженер вазифаһын алыу **5.** *обычно мн.* **места́** (*местность*) урын, ер, яҡ; **краси́вые места́** матур ерҙәр **6.** (*предмет, вещь багажа*) киҫәк, төргәк, әйбер; **сдать в бага́ж два ме́ста** багажға ике әйбер (төргәк) тапшырыу **7.** *мн.* **места́** (*периферия*) урындар; **рабо́та на места́х** урындарҙағы эштәр ♦ **ме́сто заключе́ния** төрмә; **места́ о́бщего по́льзования** йәмәғәт файҙаланыу урындары (*кухня, бәҙрәф һ.б.*); **на ме́сте** урынында, шул уҡ урында, шул уҡ ваҡытта; **на своём ме́сте** *кто* үҙ урынында; **не на своём ме́сте** *кто* үҙ урынында түгел; **к ме́сту**; **у ме́ста** урынлы, тейешле; **не к ме́сту**; **не у ме́ста** урынһыҙ, тейешһеҙ; **не ме́сто**: 1) *кому* (*не следует быть где-л.*) булырға ярамай; 2) *чему* или *с неопр.* (*не полагается*) урыны түгел, ярамай; **нет ме́ста**; **не должно́ быть ме́ста** *кому-чему* урын юҡ, урын булмаҫҡа тейеш; **ни с ме́ста!** ҡуҙғалма!, тик тор!; **с ме́ста (брать, взять)** шунда уҡ, бик тиҙ, һуҙмай, туҡталып тормай; **на ме́сте уложи́ть (положи́ть, уби́ть)** шунда уҡ атып үлтереү; **ме́ста себе́ не находи́ть** үҙеңә урын тапмау, үҙеңде ҡайҙа ҡуйырға ла белмәү; **на ме́сте преступле́ния (пойма́ть, заста́ть, накры́ть и т.п.)** *обычно шутл.* енәйәт өҫтөндә; **с ме́ста в карье́р** әҙерлекһеҙ, шунда уҡ, уйлап-нитеп тормаҫтан

**МЕСТОЖИ́ТЕЛЬСТВО** *с* йәшәгән (торған) урын; **вре́менное местожи́тельство** ваҡытлы(са) йәшәгән урын

**МЕСТОИМЕ́НИЕ** *с*; *грам.* алмаш; **определи́тельные местоиме́ния** билдәләү алмаштары

**МЕСТОИМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *грам.* алмаш ...ы

**МЕСТОНАХОЖДЕ́НИЕ** *с* торған (булған) урын; **местонахожде́ние поле́зных ископа́емых** файҙалы ҡаҙылмалар булған урын

**МЕСТОПОЛОЖЕ́НИЕ** *с* урынлашҡан ер; **местоположе́ние уса́дьбы** усадьбаның урынлашҡан ере

**МЕСТОПРЕБЫВА́НИЕ** и **МЕСТОРАСПОЛОЖЕ́НИЕ** *с см.* **местонахожде́ние**

**МЕСТОРОЖДЕ́НИЕ** *с* сыҡҡан урын; **нефтяны́е месторожде́ния** нефть сыҡҡан урындар

**МЕСТЬ** *ж* үс, ҡон; **жа́жда ме́сти** үс алыу теләге

**МЕ́СЯЦ** *м*; *в разн. знач.* ай; **в про́шлом ме́сяце** үткән айҙа; **молодо́й ме́сяц** яңы тыуған ай

**МЕ́СЯЧНИК** *м* айлыҡ; **ме́сячник безопа́сности движе́ния** хәрәкәт хәүефһеҙлеге айлығы

**МЕ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое бер айлыҡ; **ме́сячный о́тпуск** бер айлыҡ отпуск; **ме́сячная рабо́та** бер айлыҡ эш

**МЕ́ТА** *ж* тамға, ин, инәү, билге, билдә; **незнако́мая ме́та** сит инәү

**МЕТА́ЛЛ** *м* металл; **чёрные мета́ллы** ҡара металдар (*тимер, суйын, ҡорос һ.б.*); **благоро́дные мета́ллы** затлы металдар (*алтын, көмөш, ағалтын һ.б.*); **цветны́е мета́ллы** төҫлө металдар (*баҡыр, еҙ, никель һ.б.*)

**МЕТАЛЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* металл йүгертеү, металл менән көпләү; **металлизи́ровать де́рево** ағасты металл менән көпләү

**МЕТАЛЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** металл ...ы; **металли́ческая пыль** металл туҙаны **2.** металл, тимер; **металли́ческие де́ньги** металл (тимер) аҡсалар; **металли́ческий при́вкус** тимер тәме **3.** *перен.* (*о голосе, смехе*) әсе, яңғырау, ҡолаҡ ярғыс; **металли́ческий го́лос** әсе тауыш

**МЕТАЛЛО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "металл" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **металлообрабо́тка** металл эшкәртеү; **металлопромы́шленность** металл сәнәғәте

**МЕТАЛЛОВЕ́ДЕНИЕ** *с* металдарҙы өйрәнеүсе фән

**МЕТАЛЛОГРА́ФИЯ** *ж* металлография (**1.** *металдарҙың һәм иретмәләрҙең эске төҙөлөшө тураһындағы фән* **2.** *типогр. һүрәттәрҙе, яҙыуҙарҙы гравёрланған металл пластинкаларҙан баҫтырып алыу*)

**МЕТАЛЛОЛО́М** *м* металл һыныҡтары

**МЕТАЛЛОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое *горн.* металлы; **металлоно́сный слой** металлы ҡатлам

**МЕТАЛЛООБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее металл эшкәртеү ...ы; **металлообраба́тывающая промы́шленность** металл эшкәртеү сәнәғәте

**МЕТАЛЛОПРОКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое металл прокатлау ...ы; **металлопрока́тный цех** металл прокатлау цехы

**МЕТАЛЛОРЕ́ЖУЩИЙ,** -ая, -ее металл киҫеү ...ы; **металлоре́жущий стано́к** металл киҫеү станогы

**МЕТАЛЛУ́РГ** *м* металлург

**МЕТАЛЛУРГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое металлургия ...ы; **металлурги́ческий заво́д** металлургия заводы

**МЕТАЛЛУ́РГИЯ** и **МЕТАЛЛУРГИ́Я** *ж* металлургия (**1.** *металдарҙы мәғдәндән айырып алыу һәм эшкәртеү тураһында фән* **2.** *металл иретеү һәм уны башланғыс эшкәртеү сәнәғәте*)

**МЕТАМОРФИ́ЗМ** *м*; *геол.* метаморфизм (*тау тоҡомдары төҙөлөшө һәм составының үҙгәреүе*)

**МЕТАМОРФО́З** *м*; *биол.* метаморфоз, әүерелеү (*берәй нәмәнең тышҡы киәфәте һәм функциялары үҙгәреп, бер форманан икенсегә күсеүе, икенсе бер нәмә булып әүерелеүе*); **метаморфо́з гу́сеницы** ҡарышлауыктың күбәләккә әүерелеүе

**МЕТАМОРФО́ЗА** *ж* метаморфоза (*киҫкен үҙгәреш, бик ныҡ үҙгәреү*); **с ним произошла́ метаморфо́за** ул бик ныҡ үҙгәреп киткән

**МЕТА́Н** *м*; *хим.* метан (*газ*)

**МЕТА́НИЕ** *с см.* **мета́ть** I

**МЕТА́НОВЫЙ,** -ая, -ое метан ...ы; **мета́новая кислота́** метан кислотаһы

**МЕТАСТА́З** *м*; *мед.* метастаз (*тәндәге ауырыуҙың бер урындан икенсе урынға күсеүе*); **метаста́зы ра́ка** яман шеш метастазы

**МЕТАТЕ́ЗА** *ж*; *лингв.* метатеза (*һүҙҙә өндәрҙең урындарын алмаштырып әйтеү, мәҫ., "буръяк" урынына "буйраҡ" тип әйтеү*)

**МЕТА́ТЕЛЬ** *м* (*спортсмен*) ырғытыусы, сөйөп ебәреүсе; **мета́тель копья́** һөңгө ырғытыусы

**МЕТА́ТЬ I** *несов.* **1.** *что, чем* ырғытыу, сөйөү; **мета́ть грана́ту** граната ырғытыу **2.** *что* туҙҙырыу, таратыу; **ве́тер ме́чет ли́стья** ел япраҡтарҙы туҙҙыра **3.** *кого-что* (*производить потомство — о рыбах и некоторых животных*) сәсеү, балалау, бала килтереү; **ры́ба ме́чет икру́** балыҡ ыуылдырыҡ сәсә; **зайчи́хи ме́чут зайча́т** инә ҡуяндар бала килтерә **4.** *что*; *карт.* һалыу, таратыу **5.** *что* (*кидая, складывать*) өйөү, һалыу; **мета́ть се́но** бесән өйөү; **мета́ть стог** кәбән һалыу ♦ **мета́ть банк** *карт.* банк тотоу; **мета́ть би́сер пе́ред сви́ньями** йүләргә аҡыл һатыу; **мета́ть гро́мы и мо́лнии** *см.* **гром**; **мета́ть жре́бий** йәрәбә һалыу

**МЕТА́ТЬ II** *несов. что* типсеү, типсеп сығыу; **мета́ть шов** йөй һыҙығын (йөйҙө) типсеп сығыу ♦ **мета́ть пе́тли**: 1) элмәк типсеү; 2) *охот.* эҙ юғалтыу (бутау)

**МЕТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ташланыу, бәргеләнеү, борһаланыу, иләүһерәү, үрһәләнеү; **больно́й мета́лся в бреду́** ауырыу һаташып борһаланды **2.** *перен.* ары-бире (үрһәләнеп, өтәләнеп) йөрөү; **мета́ться по ко́мнате** бүлмә буйлап үрһәләнеп йөрөү **3.** *страд. от* 1, 3, 5 **мета́ть** I

**МЕТАФИ́ЗИК** *м* метафизик (**1.** *фәлс. метафизика яҡлы кеше* **2.** *файҙаһыҙ, абстракт фекер йөрөтөүсе кеше*)

**МЕТАФИ́ЗИКА** *ж* метафизика (**1.** *фәлс. диалектикаға ҡапма-ҡаршы булған фәлсәфә* **2.** *абстракт фекер*; *аңлайышһыҙ, томанлы фекер*)

**МЕТАФИЗИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое метафизик; **метафизи́ческий ме́тод** метафизик ысул

**МЕТА́ФОРА** *ж*; *лит.* метафора (*берәй оҡшашлыҡ нигеҙендә күсмә мәғәнә менән әйтелгән һүҙ йәки әйтем*)

**МЕТАФОРИ́ЧЕСКИЙ** и **МЕТАФОРИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *лит.* **1.** метафорик (*кинәйәле, күсмә мәғәнәһендә*); **метафори́ческое употребле́ние слов** һүҙҙәрҙең метафорик ҡулланылышы **2.** метафораға бай; **метафори́ческий стиль** метафораға бай стиль

**МЕТЕ́ЛИЦА** *ж*; *разг. см.* **мете́ль**

**МЕТЁЛКА** *ж* **1.** бәләкәй һепертке **2.** *бот.* һеперткебаш, суҡ (*сәскә*) ♦ **под метёлку** *прост.* ҡырып-һепереп (алып бөтөрөү)

**МЕТЕ́ЛЬ** *ж* буран, ҡар бураны

**МЕТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** буран ...ы; **мете́льный снег** буран ҡары **2.** буранлы; **мете́льная ночь** буранлы төн

**МЕТЕ́ЛЬЧАТЫЙ,** -ая, -ое *бот.* һепертке башлы; **мете́льчатые расте́ния** һепертке башлы үҫемлектәр

**МЕТЁНЫЙ,** -ая, -ое һеперелгән; **метёный пол** һеперелгән иҙән

**МЕТЕО́Р** *м* метеор (*атылған йондоҙ*)

**МЕТЕОРИ́Т** *м*; *астр.* метеорит (*йыһан киңлегенән Ерҙең атмосфераһына инеп, ергә төшкән есем*)

**МЕТЕОРИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое метеорит ...ы; **метеори́тные части́цы** метеорит киҫәктәре ♦ **метеори́тный дождь** метеорит ямғыры (*Ергә төшкән метеорит ярсыҡтары*)

**МЕТЕО́РНЫЙ,** -ая, -ое метеор ...ы; **метео́рная пыль** метеор туҙаны ♦ **метео́рный дождь** метеор ямғыры (*күп һандағы метеор ағымы*)

**МЕТЕОРО́ЛОГ** *м* метеоролог, метеорология белгесе

**МЕТЕОРОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** метеорология ...ы; **метеорологи́ческая сво́дка** метеорология мәғлүмәте; **метеорологи́ческая ста́нция** метеорология станцияһы **2.** метеорологик; **метеорологи́ческие наблюде́ния** метеорологик күҙәтеүҙәр

**МЕТЕОРОЛО́ГИЯ** *ж* метеорология (**1.** *Ер атмосфераһының төҙөлөшө, үҙенсәлектәре һәм ундағы физик процестар тураһындағы фән* **2.** *һауа торошо тураһында мәғлүмәт*)

**МЕТИЗА́ЦИЯ** *ж*; *биол.* метислаштырыу (*тоҡом, сорт яҡшыртыу өсөн төрлө сорт үҫемлек йәки төрлө тоҡом хайуандарҙы ҡушыу*); **сохраня́ть поро́ду путём метиза́ции** метислаштырыу ысулы менән тоҡомдо һаҡлау

**МЕТИ́ЗЫ** *только мн.*; *тех.* металл эшләнмәләр (әйберҙәр) (*мәҫ., сым, һалҡын прокат таҫмаһы*)

**МЕТИ́Л** *м*; *хим.* метил; **хло́ристый мети́л** хлорлы метил

**МЕТИ́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое *хим.* **1.** метил ...ы; **мети́ловый спирт** метил спирты **2.** метиллы; **мети́ловый эфи́р** метиллы эфир

**МЕТИ́С** *м* метис (**1.** *метислаштырыуҙан барлыҡҡа килгән мал йәки үҫемлек* **2.** *ике раса кешеһенән тыуған бала* **3.** *һинд һәм европеоид расаһы кешеләренән тыуған бала*)

**МЕ́ТИТЬ I** *несов. кого-что* билдә һалыу, тамға (инәү) һалыу; **ме́тить бельё** кейемгә билдә һалыу; **ме́тить ове́ц** һарыҡтарға инәү һалыу

**МЕ́ТИТЬ II** *несов.* **1.** *в кого-что* күҙәү, төбәү, тоҫҡау; **ме́тить в цель** сәпкә төбәү **2.** *перен., разг.* иҫәп тотоу, йыйыныу, ынтылыу; **ме́тить в генера́лы** генерал булырға иҫәп тотоу **3.** *в кого-что, куда*; *перен. разг.* төрттөрөү, төрттөрөп әйтеү (һөйләү)

**МЕ́ТИТЬСЯ** *несов. см.* **ме́тить** II 1; **ме́титься в цель** сәпкә төбәү

**МЕ́ТКА** *ж* **1.** *см.* **ме́тить** I; **2.** тамға, билге, билдә, ин, инәү; **поста́вить на де́реве ме́тку** ағасҡа билдә һалыу

**МЕ́ТКИЙ,** -ая, -ое **1.** мәргән, тура; **ме́ткий стрело́к** мәргән атыусы; **ме́ткий уда́р** тура һуғыу **2.** *перен.* тапҡыр, берәгәйле, үткер; **ме́ткое сло́во** тапҡыр һүҙ

**МЕ́ТКОСТЬ** *ж* **1.** мәргәнлек, туралыҡ; **ме́ткость вы́стрела** атыуҙың мәргәнлеге **2.** *перен.* тапҡырлыҡ, берәгәйлек, үткерлек; **ме́ткость сравне́ния** сағыштырыуҙың тапҡырлығы

**МЕТЛА́** *ж* һепертке; **но́вая метла́** яңы һепертке

**МЕТЛИ́ЦА** *ж* һеперткебаш (*сүп үләне*)

**МЕТНУ́ТЬ** *сов. см.* **мета́ть** I 1

**МЕТНУ́ТЬСЯ** *сов. см.* **мета́ться** I 1, 2

**МЕ́ТОД** *м* метод, ысул, алым, юл; **сравни́тельный ме́тод** сағыштырыу ысулы; **ме́тод обуче́ния** уҡытыу алымы; **ме́тод проте́ста** ризаһыҙлыҡ белдереү юлы

**МЕТО́ДИКА** *ж* методика, алым, ысул (**1.** *ҡағиҙәләр системаһы* **2.** *ниндәй ҙә булһа фәнде уҡытыу алымдары тураһында тәғлимәт*); **мето́дика о́пытов** тәжрибәләр яһау ысулы; **мето́дика преподава́ния башки́рского языка́** башҡорт телен уҡытыу методикаһы

**МЕТОДИ́СТ** *м* методист (*методика буйынса белгес*); **методи́ст по литерату́ре** әҙәбиәт буйынса методист

**МЕТОДИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** методика ...ы; **методи́ческий кабине́т** методика кабинеты **2.** методик; **методи́ческий приём** методик алым **3.** (*строго последовательный*) системалы, эҙмә-эҙлекле; **методи́ческое иссле́дование явле́ний** күренештәрҙе эҙмә-эҙлекле тикшереү

**МЕТОДИ́ЧНОСТЬ** *ж* системалылыҡ, эҙмә-эҙлелек; **методи́чность объясне́ний** аңлатыуҙарҙың системалылығы

**МЕТОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **методи́ческий** 3; **методи́чное изуче́ние предме́та** предметты системалы өйрәнеү

**МЕТОДОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое методологик; **методологи́ческие указа́ния** методологик күрһәтмәләр

**МЕТОДОЛО́ГИЯ** *ж* методология (*фәнни тикшеренеүҙәрҙең ысулдары тураһында тәғлимәт*); **методоло́гия исто́рии** тарих фәненең методологияһы

**МЕТОНИМИ́ЧЕСКИЙ** и **МЕТОНИМИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *лит.* метонимик, метонимияға бай; **метоними́ческое сло́во** метонимик һүҙ; **метоними́ческий стиль** метонимияға бай стиль

**МЕТОНИ́МИЯ** *ж*; *лит.* метонимия (*ике аралағы бәйләнеш нигеҙендә бер нәмәнең икенсе нәмә исеме менән аталыуы, мәҫ., "урамда халыҡ шаулай" урынына "урам шаулай" тип әйтеү*)

**МЕТР I** *м* метр (**1.** *оҙонлоҡ үлсәү берәмеге* **2.** *бер метр оҙонлоҡтағы линейка*); **измеря́ть складны́м ме́тром** йыйылмалы метр менән үлсәү

**МЕТР II** *м* метр (**1.** *әҙ. шиғырҙа баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙең билдәле рәүештә теҙелеүе* **2.** *муз. музыкаль тактта төрлө көстәге һуғымдарҙың дөрөҫ сиратлашыуы*)

**МЕТРА́Ж** *м* метраж (**1.** *метр менән үлсәнгән оҙонлоҡ* **2.** *берәй нәмәнең квадрат метр менән күрһәтелгән майҙаны*); **метра́ж тка́ни** туҡыманың метражы; **метра́ж кварти́ры** фатирҙың метражы

**МЕТРДОТЕ́ЛЬ** *м* метрдотель (*ресторанда баш официант*); **служи́ть метрдоте́лем** метрдотель булып хеҙмәт итеү

**МЕ́ТРИКА I** *ж*; *лит.* метрика (*шиғыр төҙөлөшө һәм уның үлсәме тураһында тәғлимәт*)

**МЕ́ТРИКА II** *ж* метрика (*тыуыу тураһында таныҡлыҡ*)

**МЕТРИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое метрлы; **метри́ческая систе́ма мер** метрлы үлсәүҙәр системаһы

**МЕТРИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое *лит.* метрик ♦ **метри́ческое стихосложе́ние** метрик шиғыр төҙөлөшө

**МЕТРИЧЕСКИЙ III: метри́ческая кни́га** метрика кенәгәһе; **метри́ческое свиде́тельство** метрика кенәгәһендәге танытма; **метри́ческая вы́пись** метрика кенәгәһенән ал(ын)ған күсермә

**МЕТРО́** *с нескл.* метро; **вы́йти из метро́** метронан сығыу

**МЕТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое метрлы, бер метр оҙонлоғондағы, (бер) метр киңлегендәге; **метро́вая доска́** бер метрлы таҡта

**МЕТРО́ЛОГ** *м* метролог, метрология белгесе

**МЕТРОЛО́ГИЯ** *ж* метрология (*үлсәү берәмектәре һәм үлсәүҙәр тураһындағы фән*)

**МЕТРОНО́М** *м* метроном (*ваҡыттың теүәллеген үлсәү өсөн һәм музыкаль темп билдәләү өсөн ҡулланылған маятниклы механик прибор*); **ма́ятник метроно́ма** метроном маятнигы

**МЕТРОПОЛИТЕ́Н** *м* метрополитен, метро

**МЕТРОПО́ЛИЯ** *ж* метрополия (*колониялары булған дәүләттең атамаһы*)

**МЕ́ТЧИК** *м* тамға һалыусы, тамғалаусы; **ме́тчики доро́ги** юл тамғалаусы кешеләр

**МЕТЧИ́К** *м*; *спец.* метчик (*тикшеренергә винт һырҙары яһау ҡоралы*)

**МЕХ I** *м* **1.** тире, мех; **ли́сий мех** төлкө тиреһе **2.** *мн.* **меха́** тире кейем; **ходи́ть в меха́х** тире кейемдә йөрөү **3.** *мн.* **мехи́** (*мешок из шкуры животных*) турһыҡ; **мех для вина́** шарап турһығы

**МЕХ II** *м см.* **мехи́**

**МЕХАНИЗА́ТОР** *м* механизатор

**МЕХАНИЗА́ЦИЯ** *ж* механизациялау, механикалаштырыу; **механиза́ция трудоёмких рабо́т** ауыр эштәрҙе механизациялау

**МЕХАНИЗИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **механизи́ровать 2.** *прил.* механизацияланған, механикалаштырылған; **механизи́рованные войска́** механизацияланған ғәскәр (*машиналар менән тәьмин ителгән*)

**МЕХАНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* механизациялау, механикалаштырыу; **механизи́ровать се́льское хозя́йство** ауыл хужалығын механизациялау

**МЕХАНИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* механизацияланыу, механикалаштырылыу **2.** *несов. страд. от* **механизи́ровать**

**МЕХАНИ́ЗМ** *м*; *прям., перен.* механизм; **механи́зм замка́** йоҙаҡ механизмы; **подъёмный механи́зм** күтәреү механизмы; **механи́зм хими́ческой реа́кции** химик реакцияның механизмы

**МЕХА́НИК** *м* механик (**1.** *механика белгесе* **2.** *машинаны ҡарап эшләтеүсе*); **иссле́дования меха́ников** механиктарҙың тикшеренеүҙәре; **контро́льный пункт меха́ника** механиктың контроль пункты

**МЕХА́НИКА** *ж* механика (**1.** *есемдәрҙең араүыҡтағы хәрәкәтен өйрәнеүсе фән; техникала хәрәкәт һәм көс тураһындағы фәнде ғәмәлдә файҙаланыу мәсьәләһе менән шөғөлләнгән тармағы* **2.** *күсм. берәй нәмәнең ҡатмарлы эске төҙөлөшө*)

**МЕХАНИСТИ́ЧЕСКИЙ** и **МЕХАНИСТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *филос.* механистик; **механисти́ческая тео́рия** механистик теория

**МЕХАНИЦИ́ЗМ** *м*; *филос.* механицизм (*донъяның күп төрлө күренешен ябай материя өлөшсәләренең механик хәрәкәтенә, ә ҡатмарлы үҫеш закондарын ябай механика ҡанундарына ҡайтарып ҡалдырған метафизик фекер ысулы*)

**МЕХАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** механик; **возде́йствие механи́ческих сил** механик көстәрҙең тәьҫире **2.** механик, механизмлы; **механи́ческая пила́** механик быҫҡы; **механи́ческое обору́дование** механизмлы ҡоролма **3.** механика ...ы, механизм яһау ...ы; **механи́ческая мастерска́я** механизмдар яһау оҫтаханаһы; **механи́ческий заво́д** механика заводы **4.** *перен.* төптән уйламай, механик рәүештә, ихтыярһыҙ, үҙенән-үҙе; **механи́ческий подхо́д к де́лу** төптән уйламай эш итеү; **механи́ческое движе́ние** ихтыярһыҙ хәрәкәт

**МЕХАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **механи́ческий** 4

**МЕХИ́** и **МЕХА́** *мн.* (*ед.* **мех** *м*) күрек; **кузне́чный мех** тимерлек күреге; **мехи́ гармо́ни** гармун күреге

**МЕХОВО́Й,** -ая, -ое **1.** тире ...ы, мех; **мехова́я фа́брика** тире фабрикаһы **2.** тире, тиренән; **мехова́я ша́пка** тире бүрек

**МЕХОВЩИ́К** *м* мехсы, тиресе (**1.** *тире фабрикаһында эшләүсе* **2.** *тире иләүсе* **3.** *тире йыйыусы*)

**МЕЦЕНА́Т** *м*; *книжн.* меценат (*фәнде, сәнғәтте яҡлаған бай кеше*)

**МЕЦЕНА́ТСТВО** *с*; *книжн.* меценатлыҡ; **век мецена́тства** меценатлыҡ дәүере

**МЕ́ЦЦО-СОПРА́НО 1.** *с нескл.* меццо-сопрано (*ҡатын-ҡыҙ тауышы*); **драмати́ческое ме́ццо-сопра́но** драматик меццо-сопрано **2.** *ж нескл.* меццо-сопрано (*шундай тауышлы йырсы ҡатын-ҡыҙ*); **поёт знамени́тая ме́ццо-сопра́но** атаҡлы меццо-сопрано йырлай

**МЕЧ** *м*; *прям., перен.* ҡылыс; **взмахну́ть мечо́м** ҡылыс һелтәп ебәреү; **меч возме́здия** яза ҡылысы; **меч правосу́дия** хөкөм ҡылысы

**МЕЧЕНО́СЕЦ** *м*; *ист.* ҡылыслы кеше (*ҡылыс менән ҡоралланған һуғышсы*)

**МЕ́ЧЕНЫЙ,** -ая, -ое тамғалы, инәүле; **ме́ченое бельё** тамғалы кейем ♦ **ме́ченые а́томы** *спец.* инәүле атомдар (*радиоактив атомдар*)

**МЕЧЕ́ТЬ** *ж* мәсет; **мече́ть с минаре́том** манаралы мәсет

**МЕЧ-РЫ́БА** *ж* ҡылыс балыҡ (*диңгеҙ балығы*)

**МЕЧТА́** *ж* хыял, уй, фантазия; **сокрове́нная мечта́** йәшерен хыял; **мечта́ всей жи́зни** тормоштағы иң ҙур хыял

**МЕЧТА́НИЕ** *с* хыял, уй; **предава́ться мечта́ниям** хыялға бирелеү

**МЕЧТА́ТЕЛЬ** *м* и **МЕЧТА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* хыялға бирелеүсән (хисле, хыялый, уйсан) кеше

**МЕЧТА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* хыялға (хискә) бирелеү; **преда́ться мечта́тельности** хыялға (хискә) бирелеү

**МЕЧТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хыялый, хыялланыусан, уйсан; **мечта́тельный взгляд** уйсан ҡараш; **мечта́тельная нату́ра** хыялланыусан кеше

**МЕЧТА́ТЬ** *несов. о ком-чём, с неопр.* и *без доп.* хыялланыу, хыялға бирелеү, уйға батыу; **мечта́ть о сча́стье** бәхет тураһында хыялланыу ♦ **мечта́ть о себе́ (мно́го, высоко́ и т.п.)** *неодобр.* үҙеңде ҙурға ҡуйыу, морон күтәреү

**МЕША́ЛКА** *ж* болғаткыс, болғауыс, бутауыс; **дли́нная меша́лка** оҙон болғауыс

**МЕШАНИ́НА** *ж*; *разг.* боламыҡ, болғансыҡ, юҡ-бар, буталсыҡ; **в голове́ мешани́на** башта болғансыҡ (буталсыҡ) уйҙар

**МЕША́НКА** *ж*; *с.-х.* **1.** болғау, болғатма **2.** ҡатнаш сәсеүлек (*һоло менән кәрешкә йәки һоло менән борсаҡ сәсеүлеге*)

**МЕША́ТЬ I** *несов.* ҡамасаулау, уңайһыҙлау, яйһыҙлау; **он меша́ет рабо́тать** ул эшләргә ҡамасаулай ♦ **не меша́ет; не меша́ло бы** *кому* зыян итмәй, зыян итмәҫ ине

**МЕША́ТЬ II** *несов. что* **1.** бутау, болғатыу; **меша́ть чай ло́жечкой** сәйҙе балғалаҡ менән болғатыу **2.** (*смешивать*) ҡатнаштырыу, аралаштырыу; **меша́ть гли́ну с песко́м** балсыҡты ҡом менән аралаштырыу

**МЕША́ТЬСЯ I** *несов.*; *разг.* **1.** буталыу, ҡамасаулау; **не меша́йся под нога́ми** аяҡ аҫтында буталып йөрөмә **2.** *во что* (*вмешиваться*) ҡыҫылыу, тығылыу; **меша́ться в чужи́е дела́** сит кеше эшенә тығылыу

**МЕША́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** ҡушылыу, ҡатышыу; **звон ко́локола меша́ется с му́зыкой** ҡыңғырау сыңы музыка менән ҡушыла **2.** (*путаться — о мыслях, речи*) буталыу; **меша́ются мы́сли** уйҙар бутала **3.** *страд. от* **меша́ть** II ♦ **меша́ться в уме́ (в рассу́дке)**; **меша́ться умо́м (рассу́дком)** аҡылдан яҙыу

**МЕ́ШКАТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** аҡрын ҡыланыу, һүлпән (яй) маташыу, мыштырлау, быҙмырлау; **ме́шкать с отъе́здом** китә алмай мыштырлау **2.** (*задерживаться*) оҙаҡлау, туҡталып тороу; **здесь нельзя́ ме́шкать** бында оҙаҡларға ярамай

**МЕШКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡапсыҡланып торған, (тоҡ кеүек) киң; **мешкова́тый костю́м** киң костюм **2.** *перен.* шөкәтһеҙ, килбәтһеҙ, лупыш, топ-тотош кәүҙәле, аҡрын ҡыймылдаусан, ауыр һөйәкле; **мешкова́тая фигу́ра** килбәтһеҙ кәүҙә

**МЕШКОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое лупыш, тоҡҡа оҡшаш, топ-тотош; **мешкови́дное ту́ловище** тоҡҡа оҡшаш кәүҙә

**МЕШКОВИ́НА** *ж* ҡалын киндер, тоҡ ярпыһы; **мыть пол мешкови́ной** иҙәнде ҡалын киндер менән йыуыу

**МЕШКООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **мешкови́дный**; **мешкообра́зное те́ло** тоҡ һымаҡ кәүҙә

**МЕШО́К** *м* **1.** тоҡ; **мешо́к муки́** бер тоҡ он **2.** *разг.* лупыш, лырҡыш (*кешегә ҡарата*) **3.** *воен.* тоҡ, ҡамау, ҡапҡан (*ғәскәрҙең тулыһынса ҡамалып алыныуы*) ♦ **спа́льный мешо́к** йоҡлар өсөн тоҡ; **мешки́ под глаза́ми** күҙ төптәре шешенке; **сиди́т мешко́м** *что* киң, тоҡ һымаҡ (*кейемгә ҡарата*)

**МЕЩАНИ́Н** *м* и **МЕЩА́НКА** *ж* мещан (**1.** *мещандар ҡатламынан булған ир кеше* **2.** *күсм. тар ҡарашлы, үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртҡан кеше*)

**МЕЩА́НСКИЙ,** -ая, -ое **1.** мещан(дар) ...ы; **меща́нское сосло́вие** мещандар ҡатламы **2.** *перен.* мещанлыҡ ...ы; **меща́нская идеоло́гия** мещанлыҡ идеологияһы

**МЕЩА́НСТВО** *с* **1.** (*сословие*) мещандар **2.** *перен.* мещанлыҡ; **проявля́ть меща́нство** мещанлыҡ күрһәтеү

**МИ** *с нескл.*; *муз.* ми (*музыка гаммаһында өсөнсө нота*)

**МИА́ЗМЫ** *мн.* (*ед.* **миа́зма** *ж*; *уст.*); *книжн.* миазмдар (*серегән нәмәләрҙән сыҡҡан ағыулы быу*)

**МИГ** *м* бик ҡыҫҡа (аҙ) ваҡыт, минут, мәл; **взгляну́ть на миг на не́бо** бер мәлгә күк йөҙөнә ҡарап алыу ♦ **в тот же миг** шунда уҡ, шул уҡ минутта; **в оди́н миг** күҙ асып йомғансы

**МИГРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое миграция ...ы; **миграцио́нная тео́рия** миграция теорияһы; **миграцио́нные пути́ рыб** балыҡтарҙың миграция юлдары

**МИГРА́ЦИЯ** *ж* миграция (**1.** *тар., этн. халыҡтарҙың ил эсендә йәки бер илдән икенсеһенә күсеүе* **2.** *биол. йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың урындан-урынға күсеүе* **3.** *кит. ниҙеңдер күсеше, йөрөшө*); **вну́тренняя мигра́ция** эске миграция; **междунаро́дная мигра́ция** халыҡ-ара миграция; **сезо́нная мигра́ция рыб** балыҡтарҙың миҙгел миграцияһы; **мигра́ция расти́тельных кле́ток** үҫемлек күҙәнәктәренең миграцияһы ♦ **мигра́ция капита́ла** капитал миграцияһы (*файҙа итеү теләге менән капиталды бер илдән икенсе илгә йәки урындан-урынға күсереү*)

**МИГРЕ́НЬ** *ж*; *мед.* мигрень, баш өйәнәге (*баш ауырыуы*)

**МИГРИ́РОВАТЬ** *несов.*; *книжн.* күсеү, китеү, күсеп йөрөү, миграциялау, миграция яһау; **пти́цы мигри́руют в тёплые края́** ҡоштар йылы яҡтарға китә

**МИЕЛИ́Т** *м*; *мед.* миелит (*арҡа мейеһенең шешеүе*)

**МИЗАНСЦЕ́НА** *ж* мизансәхнә (*спектакль барышында артистарҙың сәхнәлә урынлашыуы*); **мизансце́ны массо́вок** күп кеше ҡатнашҡан мизансәхнәләр

**МИЗАНТРО́П** *м*; *книжн.* мизантроп, кеше яратмаусы (күрә алмаусы)

**МИЗАНТРО́ПИЯ** *ж*; *книжн.* мизантропия, кеше яратмау (күрә алмау)

**МИЗЕ́РНЫЙ** и **МИ́ЗЕРНЫЙ,** -ая, -ое бик аҙ, бик бәләкәй; **мизе́рный срок** бик аҙ ваҡыт

**МИЗИ́НЕЦ** *м* сәтәкәй, сыңғарсай, сыңғарсай бармаҡ ♦ **не сто́ит мизи́нца** *чьего* тырнағына ла тормай; **с мизи́нец**; **на мизи́нец** бик аҙ ғына, тырнаҡ осо ҡәҙәр

**МИКРО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең "бик (иң) бәләкәй", "бәләкәй" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **микроскопи́ческий** бик бәләкәй; **микроинфа́ркт** микроинфаркт

**МИКРО́Б** *м* микроб (*бер күҙәнәкле микроскопик организм*); **болезнетво́рные микро́бы** ауырыу тыуҙырыусы микробтар

**МИКРОБИО́ЛОГ** *м* микробиолог, микробиология белгесе

**МИКРОБИОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое микробиология ...ы; **микробиологи́ческая лабора́тория** микробиология лабораторияһы

**МИКРОБИОЛО́ГИЯ** *ж* микробиология (*микроорганизмдарҙы өйрәнеүсе фән*)

**МИКРОКЛИ́МАТ** *м*; *прям.*, *перен.* микроклимат; **микрокли́мат леси́стой ме́стности** урманлы урындың микроклиматы; **микрокли́мат коллекти́ва** коллективтағы микроклимат

**МИКРОКО́СМ** и **МИКРОКО́СМОС** *м* микрокосм (*атом, электрон һ.б. сикһеҙ бәләкәй дәүмәлдәр донъяһы*)

**МИКРОЛИТРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое (бик) бәләкәй литражлы; **микролитра́жный автомоби́ль** бик бәләкәй литражлы автомобиль

**МИКРО́МЕТР** *м* микрометр (*иң бәләкәй оҙонлоҡ үлсәмен теүәл билдәләүсе ҡорал*)

**МИКРОМЕТРИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое микрометрия ...ы; **микрометри́ческие измере́ния** микрометрия үлсәүҙәре; **микрометри́ческие наблюде́ния** микрометрия күҙәтеүҙәре

**МИКРОМЕ́ТРИЯ** *ж* микрометрия (*иң бәләкәй оҙонлоҡтарҙың һәм өлөшсәләрҙең үлсәме*)

**МИКРОМИ́Р** *м* иң бәләкәй дәүмәлдәр донъяһы

**МИКРО́Н** *м* микрон (*метрҙың миллиондан бер өлөшө*)

**МИКРООРГАНИ́ЗМ** *м* микроорганизм (*ябай күҙгә күренмәгән үҫемлек йәки хайуан организмы*)

**МИКРОРАЙО́Н** *м* микрорайон, биҫтә (*район бүленешендә иң бәләкәй бер өлөш*); **микрорайо́н шко́лы** мәктәп микрорайоны

**МИКРОСКО́П** *м* микроскоп; **электро́нный микроско́п** электронлы микроскоп

**МИКРОСКОПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** микроскопик, микроскоп ярҙамында; **микроскопи́ческие иссле́дования** микроскопик тикшеренеүҙәр **2.** микроскопик, микроскоп аша ғына күренгән; **микроскопи́ческое расте́ние** микроскоп аша ғына күренгән үҫемлек **3.** *перен.*, *разг.* (*чрезвычайно малый*) бик бәләкәй, бик аҙ; **микроскопи́ческая до́за** бик бәләкәй доза

**МИКРОСКОПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **микроскопи́ческий** 3

**МИКРОСКОПИ́Я** *ж* микроскопия (*микроскоп менән эш итеү һәм микроскопик препараттарҙы әҙерләү юлдарын өйрәнеүсе фән*); **обуча́ть микроскопи́и** микроскопияға өйрәтеү; **медици́нская микроскопи́я** медицина микроскопияһы

**МИКРОСКО́ПНЫЙ,** -ая, -ое микроскоп ...ы; **микроско́пное стекло́** микроскоп быялаһы

**МИКРОСТРУКТУ́РА** *ж*; *спец.* микроструктура (*ҡаты матдәләрҙең микроскоп аша ғына күренгән иң ваҡ төҙөлөшө*); **микрострукту́ра мета́лла** металдың микроструктураһы

**МИКРОФИ́ЛЬМ** *м* микрофильм (*ҡулъяҙма, баҫма йәки график документтарҙың фото- йәки кинотаҫмаға кесерәйтеп төшөрөлгән күсермәһе*); **микрофи́льм кни́ги** китаптың микрофильмы

**МИКРОФЛО́РА** *ж* микрофлора (*тупраҡта, һауала, аҙыҡта һ.б. булған микроорганизмдар*); **иссле́довать микрофло́ру по́чвы** тупраҡтың микрофлораһын тикшереү

**МИКРОФО́Н** *м* микрофон; **петь че́рез микрофо́н** микрофондан йырлау

**МИКРОФОТОГРА́ФИЯ** *ж* микрофотография

**МИКРОЦЕФА́Л** *м*; *антроп.* бесәй баш кеше (*башы бик бәләкәй*)

**МИКРОЭЛЕМЕ́НТЫ** *мн.* (*ед.* **микроэлеме́нт** *м*) микроэлемент (*үҫемлек һәм хайуан организмында бик аҙ миҡдарҙа булған химик элемент*); **микроэлеме́нты о́чень ва́жны для органи́зма** микроэлементтар организмға бик кәрәк

**МИ́КСЕР** *м* миксер (**1.** *тех. шыйыҡ суйынды домна мейесенән алыу һәм туплау өсөн һауыт* **2.** *конд. һыуыҡ эсемлектә тиҙ генә болғау, йомортҡа һ.б. туҡыу, шулай уҡ крем, коктейль яһау приборы*); **пригото́вить кокте́йль с по́мощью ми́ксера** миксер ярҙамында коктейль әҙерләү

**МИКСТУ́РА** *ж* микстура (*төрлө матдәне ҡушып эшләгән шыйыҡ дарыу*); **го́рькая миксту́ра** әсе микстура

**МИЛЕ́ЙШИЙ,** -ая, -ое *см.* **ми́лый**

**МИ́ЛЕНЬКИЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** һөйкөмлө, матур, ягымлы; **ми́ленькая де́вочка** һөйкөмлө ҡыҙ; **ми́ленькое пла́тье** матур ғына күлдәк **2.** һөйөклө, ҡәҙерле; **ми́ленький дружо́к** һөйөклө дуҫ **3.** (*при обращении*) һөйөклөм, йәнем, иркәм ♦ **как ми́ленький** *прост.*: 1) бер һүҙһеҙ, бер һүҙ әйтмәйенсә; 2) бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, ҡаршылашмайынса, тотҡарлыҡһыҙ

**МИЛИТАРИЗА́ЦИЯ** *ж* милитаризациялау; **милитариза́ция эконо́мики** иҡтисадты милитаризациялау

**МИЛИТАРИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов.* *что* милитаризациялау, милитаризация үткәреү; **милитаризи́ровать промы́шленность** сәнәғәтте милитаризациялау

**МИЛИТАРИ́ЗМ** *м* милитаризм (**1.** *ҡайһы бер дәүләттәрҙең ҡоралланыуға, һуғышҡа әҙерләнеүгә йүнәлдерелгән сәйәсәте* **2.** *ҡайһы бер илдәрҙә хәрби көстәрҙең сәйәси хакимлығы*); **поли́тика милитари́зма** милитаризм сәйәсәте

**МИЛИТАРИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов.* *см.* **милитаризи́ровать**

**МИЛИТАРИ́СТ** *м* милитарист

**МИЛИТАРИСТИ́ЧЕСКИЙ** и **МИЛИТА-РИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое милитаристик; **милитаристи́ческая поли́тика** милитаристик сәйәсәт; **милитаристи́ческие группиро́вки** милитаристик төркөмдәр; **милитари́стская организа́ция** милитаристик ойошма; **милитари́стские взгля́ды** милитаристик ҡараштар

**МИЛИЦЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое милиция ...ы, милиционер ...ы; **милице́йский уча́сток** милиция участкаһы; **милице́йская фо́рма** милиционер формаһы

**МИЛИЦИОНЕ́Р** *м* милиционер; **постово́й милиционе́р** постағы милиционер; **участко́вый милиционе́р** участка милиционеры

**МИЛИЦИОНЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое милиционер ...ы; **милиционе́рская шине́ль** милиционер шинеле; **милиционе́рские отря́ды** милиционер отрядтары

**МИЛИ́ЦИЯ** *ж* милиция; **рабо́тники мили́ции** милиция хеҙмәткәрҙәре

**МИЛЛИА́РД** *м* миллиард; **миллиа́рд рубле́й де́нег** бер миллиард (һум) аҡса; **миллиа́рды звёзд** миллиард (иҫәпһеҙ-хисапһыҙ) йондоҙҙар

**МИЛЛИАРДЕ́Р** *м* миллиардер

**МИЛЛИА́РДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* миллиардынсы; **миллиа́рдная часть** миллиардынсы өлөш **2.** *прил.* миллиардлаған, миллиардтарса, миллиард менән иҫәпләнгән; **миллиа́рдное состоя́ние** миллиард менән иҫәпләнгән мөлкәт

**МИЛЛИГРА́ММ** *м* миллиграмм

**МИЛЛИГРА́ММОВЫЙ,** -ая, -ое миллиграмлы; **миллигра́ммовый разнове́с** миллиграмлы гер

**МИЛЛИМЕ́ТР** *м* миллиметр; **разделённая на миллиме́тры лине́йка** миллиметрҙарға бүленгән линейка

**МИЛЛИМЕТРО́ВКА** *ж*; *разг.* миллиметровка (*һыҙмалар яһау өсөн миллиметрҙарға бүленгән шаҡмаҡлы ҡағыҙ*)

**МИЛЛИМЕТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое бер миллиметрлы; **миллиметро́вая толщина́** бер миллиметрлы ҡалынлыҡ ♦ **миллиметро́вая бума́га** *см.* **миллиметро́вка**

**МИЛЛИО́Н** *м* миллион; **счита́ть до миллио́на** миллионға ҡәҙәр һанау; **миллио́ны рек и озёр** миллионлаған йылға һәм күлдәр

**МИЛЛИОНЕ́Р** *м*; *в разн. знач.* миллионер; **её оте́ц был миллионе́ром** уның атаһы миллионер ине; **колхо́з-миллионе́р** миллионер колхоз; **лётчики-миллионе́ры** миллионер осоусылар (*миллион километрҙан артыҡ осҡан лётчиктар*)

**МИЛЛИОНЕ́РША** *ж*; *разг.* **1.** миллионер **2.** миллионерҙың ҡатыны

**МИЛЛИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *числ.* миллионсы, миллионынсы; **миллио́нный жи́тель го́рода** ҡаланың миллионынсы кешеһе **2.** миллионлаған, миллион менән иҫәпләнгән; **миллио́нные дохо́ды** миллионлаған килем; **миллио́нная а́рмия** миллион менән иҫәпләнгән армия

**МИЛЛИО́НЩИК** *м* и **МИЛЛИО́НЩИЦА** *ж*; *разг.* миллионер

**МИЛОВА́ТЬ** *несов. кого-что*; *трад.-поэт.*, *прост.* иркәләү, һөйөү, ғәфү итеү

**МИЛОВА́ТЬСЯ** *несов.*; *трад.-поэт.*, *прост.* иркәләшеү, һөйөшеү

**МИЛОВИ́ДНОСТЬ** *ж* яғымлылыҡ, һөйкөмлөлөк; **милови́дность улы́бки** йылмайыуҙың яғымлылығы

**МИЛОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое яғымлы, һөйкөмлө; **милови́дное ли́чико** һөйкөмлө йөҙ

**МИЛОСЕ́РДИЕ** *с* шәфҡәт, рәхимлек, мәрхәмәт; **прояви́ть милосе́рдие** шәфҡәт күрһәтеү ♦ **сестра́ милосе́рдия** шәфҡәт туташы

**МИЛОСЕ́РДНЫЙ,** -ая, -ое шәфҡәтле, мәрхәмәтле, рәхимле; **милосе́рдная рабо́та** шәфҡәтле эш

**МИ́ЛОСТЫНЯ** *ж* хәйер; **проси́ть ми́лостыню** хәйер һора(шы)у

**МИ́ЛОСТЬ** *ж* мәрхәмәт, шәфҡәт, рәхимлелек; **из ми́лости** мәрхәмәт йөҙөнән; **оказа́ть ми́лость** шәфҡәт күрһәтеү ♦ **ми́лости про́сим (прошу́)** рәхим итегеҙ; **сде́лайте ми́лость** рәхим итә күрегеҙ, рәхим итеп; **вкра́сться (войти́) в ми́лость** шәфҡәт ҡанаты аҫтына инеү (*кемдең*); **скажи́(те) на ми́лость** бына һиңә кәрәк булһа, быны тағы

**МИ́ЛОЧКА** *м* и *ж*; *разг.* (*при обращении, преимущественно к женщине*) һөйөклөм, ҡәҙерлем

**МИ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** яғымлы, һөйкөмлө; **ми́лый челове́к** һөйкөмлө кеше; **ми́лая улы́бка** яғымлы йылмайыу **2.** һөйөклө, ҡәҙерле; **ми́лый друг** һөйөклө дуҫ **3.** *в знач. сущ.* **ми́лый** *м* и **ми́лая** *ж* һөйгән йәр ♦ **вот (э́то) ми́ло** бына тағы, бына һиңә кәрәк булһа; **за ми́лую ду́шу** теләп, уйлап та тормайынса (*мәҫ., әйберҙе биреп ебәреү*); **мил челове́к** хөрмәтлем, аҡыллым; **с ми́лым рай и в шалаше́** һөйгәнең менән ҡыуышта ла ожмах

**МИ́ЛЯ** *ж* миль (*оҙонлоҡ үлсәүе*); **географи́ческая ми́ля** географик миль (*7468 метр*); **морска́я ми́ля** диңгеҙ миле (*1853 метр*)

**МИМ** *м* мим (*ым һәм пластика ярҙамында ғына уйнай торған актёр*); **не́гры счита́ются са́мыми лу́чшими ми́мами** негрҙар иң яҡшы мимдар тип һанала

**МИ́МИКА** *ж* мимика, ым; **пока́зывать ми́микой** ым менән күрһәтеү

**МИМИКРИ́Я** *ж*; *биол.* мимикрия (*ҡайһы бер үҫемлектәрҙең, йәнлектәрҙең йәшәгән тәбиғи мөхитенә ярашлы төҫөн йәки тышҡы рәүешен үҙгәртеүе*); **спосо́бность не́которых расте́ний к мимикри́и** ҡайһы бер үҫемлектәрҙең мимикрияға һәләтлеге

**МИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое мимик; **мими́ческая сце́на** мимик сәхнә

**МИ́МО** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* эргәнән, ситтән; **он прошёл ми́мо** ул эргәнән үтеп китте **2.** *предлог с род. п.* ситкә, ҡырға, эргәһенән, янынан; **стреля́ть ми́мо це́ли** сәптән ситкә атыу; **пройти́ ми́мо до́ма** өй эргәһенән үтеү ♦ **ми́мо рта прошло́** ауыҙға эләкмәне; **ми́мо уше́й** ҡолаҡҡа элмәү

**МИМОЕ́ЗДОМ** *нареч.*; *разг.* үтеп (уҙып) барышлай; **мимое́здом я побыва́л у друзе́й** үтеп барышлай мин дуҫтарымда булдым

**МИМО́ЗА** *ж* мимоза (**1.** *тропик үҫемлек — ағас, ҡыуаҡ, лиана* **2.** *субтропик акация төрө*)

**МИМОЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое тиҙ үтә (бөтә) торған, ҡыҫҡа (аҙ) ғына ваҡытлы, ваҡытлы ғына була торған; **мимолётная ра́дость** тиҙ үтә торған шатлыҡ; **мимолётное сча́стье** ҡыҫҡа ғына ваҡытлы бәхет

**МИМОЛЁТОМ** *нареч.* үтеп (уҙып) барышлай, юл ыңғайында ғына, осоп уҙышлай (барышлай) ғына; **да́же пти́цы здесь то́лько мимолётом остана́вливаются** ҡоштар ҙа бында осоп барышлай ғына туҡтай

**МИМОХО́ДОМ** *нареч.* **1.** (*проходя мимо*) үтеп (уҙып) барышлай, юл ыңғайында ғына; **зайти́ мимохо́дом в поликли́нику** юл ыңғайында поликлиникаға инеп сығыу **2.** (*между прочим*) һүҙ ыңғайында, яйы тура килгәндә; **мимохо́дом сказа́ть** һүҙ ыңғайында әйтеп ҡуйыу

**МИ́НА I** *ж* мина; **противота́нковая ми́на** танкыға ҡаршы мина ♦ **подложи́ть ми́ну** *кому, под кого* аҫтыртын ғына насарлыҡ эшләү

**МИ́НА II** *ж* ҡиәфәт, сырай; **ки́слая ми́на** һытыҡ сырай ♦ **де́лать весёлую (хоро́шую) ми́ну при плохо́й игре́** күңелһеҙлекте тышҡы тыныслыҡ менән йәшерергә тырышыу

**МИНАРЕ́Т** *м* манара; **минаре́т мече́ти** мәсет манараһы

**МИНДАЛЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое баҙамға (миндалгә) оҡшаған, баҙам кеүек; **миндалеви́дные глаза́** баҙам кеүек (оҙонса) күҙҙәр

**МИНДА́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое баҙам ...ы; **минда́левое де́рево** баҙам ағасы

**МИНДА́ЛИНА** *ж* **1.** баҙам сәтләүеге; **выбира́ть кру́пные минда́лины** баҙам сәтләүегенең эреләрен һайлап алыу **2.** *анат.* баҙам кеүек биҙ, баҙам биҙ; **у больно́го увели́чены минда́лины** ауырыуҙың баҙам биҙҙәре ҙурайған

**МИНДА́ЛЬ** *м* миндаль, баҙам (*ағасы һәм емеше*); **ве́тка миндаля́** баҙам ботағы; **собира́ть минда́ль** баҙам йыйыу

**МИНДА́ЛЬНИЧАТЬ** *несов. с кем-чем* и *без доп.*; *разг.* **1.** (*нежничать*) наҙланыу, сөсөләнеү, сөсө телләнеү **2.** (*проявлять излишнюю мягкость*) йомшаҡлыҡ күрһәтеү, артыҡ йомшаҡ мөғәмәлә итеү; **вы с ним мно́го минда́льничаете** һеҙ уның менән артыҡ йомшаҡ мөғәмәлә итәһегеҙ

**МИНДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баҙам ...ы; **минда́льное ма́сло** баҙам майы **2.** баҙамлы; **минда́льное пече́нье** баҙамлы печенье **3.** (*розовый, как цветки миндаля*) алһыу, баҙам сәскәһе төҫлө; **минда́льные щёки** алһыу биттәр

**МИНЁР** *м* минасы, минёр; **минёры разряди́ли ми́ну** минасылар минаның зарядын алды

**МИНЕРА́Л** *м* минерал; **собира́ть образцы́ минера́лов** минерал өлгөләрен йыйыу

**МИНЕРАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* минераллашыу, минералға әүерелеү; **минерализа́ция органи́ческих веще́ств** органик есемдәрҙең минералға әүерелеүе

**МИНЕРАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. см.* **минерализова́ть**

**МИНЕРАЛИЗИ́РОВАТЬСЯ** *сов.*, *несов. см.* **минерализова́ться**

**МИНЕРАЛИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что* **1.** минераллаштырыу, минералға әүерелдереү; **минерализова́ть по́чву** тупраҡты минераллаштырыу **2.** туйындырыу; **минерализова́ть исто́чники соля́ми ка́льция** сығанаҡтарҙы кальций тоҙҙары менән туйындырыу

**МИНЕРАЛИЗОВА́ТЬСЯ** *сов.*, *несов.* минераллашыу; **к о́сени ли́стья сильне́е минерализу́ются** көҙгә табан япраҡтар нығыраҡ минераллаша

**МИНЕРАЛО́Г** *м* минералог, минералогия белгесе

**МИНЕРАЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое минералогия ...ы; **минералоги́ческие иссле́дования** минералогия тикшеренеүҙәре; **минералоги́ческий кабине́т** минералогия кабинеты

**МИНЕРАЛО́ГИЯ** *ж* минералогия (*минералдар тураһында фән*)

**МИНЕРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** минераль; **минера́льные вещества́** минераль матдәләр **2.** минераль, минералле; **минера́льные исто́чники** минералле сығанаҡтар; **минера́льные во́ды** минераль һыуҙар

**МИНЁРНЫЙ,** -ая, -ое минёр ...ы, минёрҙар ...ы; **минёрное иску́сство** минёр оҫталығы; **минёрная ро́та** минёрҙар ротаһы

**МИНИАТЮ́РА** *ж* миниатюра (**1.** *боронғо ҡульяҙмала буяулы баш хәреф йәки кескәй һүрәт* **2.** *бәләкәй һүрәт йәки портрет* **3.** *бәләкәй күләмле әҙәби йәки музыкаль әҫәр*) ♦ **в миниатю́ре** бәләкәй күләмдә, бәләкәй формала

**МИНИАТЮРИ́СТ** *м* миниатюрсы (**1.** *миниатюралар эшләүсе рәссам* **2.** *миниатюра авторы*)

**МИНИАТЮ́РНОСТЬ** *ж* нәфислек, ыҡсымлыҡ, йыйнаҡлыҡ; **миниатю́рность рук** ҡулдарҙың нәфислеге

**МИНИАТЮ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** миниатюра ...ы; **миниатю́рная жи́вопись** миниатюра живописы **2.** нәфис, ыҡсым, йыйнаҡ; **миниатю́рный сто́лик** ыҡсым өҫтәл; **миниатю́рная ко́мната** йыйнаҡ (ҡына) бүлмә

**МИНИМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое минималь, иң ҡыҫҡа (кәм, аҙ); **выдвига́ть минима́льные тре́бования** минималь талаптар ҡуйыу

**МИ́НИМУМ** *м* **1.** минимум, иң аҙ (кәм, түбән); **ми́нимум атмосфе́рного давле́ния** атмосфера баҫымының минимумы **2.** *в знач. нареч.* кәм тигәндә, кәмендә; **он побу́дет там ми́нимум пять дней** ул унда кәм тигәндә биш көн буласаҡ **3.** *в знач. неизм. прил.* минимум; **програ́мма-ми́нимум** программа-минимум ♦ **прожи́точный ми́нимум** йәшәү минимумы (*көнкүреште тәьмин итерлек иң аҙ аҡса*)

**МИНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* миналау, мина ҡуйыу (һалыу); **мини́ровать железнодоро́жный мост** тимер юл күперен миналау

**МИНИСТЕ́РСКИЙ,** -ая, -ое министр ...ы, министрлыҡ ...ы; **министе́рская по́дпись** министр ҡултамғаһы; **министе́рский рабо́тник** министрлыҡ хеҙмәткәре

**МИНИСТЕ́РСТВО** *с* министрлыҡ; **зда́ние министе́рства** министрлыҡ йорто

**МИНИ́СТР** *м* министр; **мини́стр иностра́нных дел** сит ил эштәре министры

**МИ́ННЫЙ,** -ая, -ое мина ...ы; **ми́нное по́ле** мина яланы (*миналанған, миналар һалынған урын*)

**МИНОВА́ТЬ 1.** *сов., несов. что* үтеп китеү, теймәй китеү, урап (әйләнеп) үтеү; **минова́ть село́** ауылды үтеп китеү **2.** *сов. чего* и *с неопр.* (*с отриц.*), *безл.* ҡотола алмау, ҡотолоп ҡала алмау; **ему́ не минова́ть наказа́ния** ул язанан ҡотолоп ҡала алмаҫ **3.** *сов.* уҙыу, үтеп (уҙып) китеү; **опа́сность минова́ла** ҡурҡыныс үтеп китте

**МИНО́ГА** *ж* минога (*умыртҡалы һыу терекләге*); **морска́я мино́га** диңгеҙ миногаһы; **речна́я мино́га** йылға миногаһы

**МИНОИСКА́ТЕЛЬ** *м* мина эҙләү аппараты (приборы)

**МИНОМЁТ** *м* миномёт; **шестиство́льный миномёт** алты көбәкле миномёт

**МИНОМЁТНЫЙ,** -ая, -ое миномёт ...ы; **миномётная батаре́я** миномёт батареяһы

**МИНОМЁТЧИК** *м* миномётсы

**МИНОНО́СЕЦ** *м* миноносец (*торпеда менән ҡоралланған хәрби карап*)

**МИНО́Р** *м* **1.** *муз.* минор (*моңло, ҡайғылы көй*); **мажо́р сменя́ется мино́ром** мажор минорға алышына **2.** *перен., разг.* күңелһеҙлек, кәйефһеҙлек; **быть в мино́ре** кәйефһеҙлектә булыу

**МИНО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *муз.* минор ...ы; **мино́рный акко́рд** минор аккорды **2.** *перен., разг.* күңелһеҙ, моңһоу, яманһыу, төшөнкө, бойоҡ; **настро́иться на мино́рный лад** төшөнкөлөккә бирелеү, бойоғоу

**МИНТА́Й** *м* минтай (*балыҡ*); **пятни́стый минта́й** тимгелле минтай

**МИНУ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **мину́ть 2.** *прил.* үткән, уҙған; **мину́вшие го́ды** уҙған йылдар **3.** *в знач. сущ.* **мину́вшее** *с* үткәндәр, уҙған заман, үткән ваҡыт; **вспомина́ть о мину́вшем** үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү

**МИ́НУС** *м* **1.** *мат.* (*знак*) минус (*ғәмәл*) **2.** *нескл.*; *мат.* (*отрицательная величина*) минус **3.** *нескл.* (*при указании на температуру ниже нуля*) һалҡынлыҡ; **ми́нус два́дцать гра́дусов** егерме градус һалҡынлыҡ **4.** *перен., разг.* етешһеҙлек; **прое́кт име́ет мно́го ми́нусов** проекттың етешһеҙлектәре күп

**МИ́НУСОВЫЙ** и **МИНУСО́ВЫЙ,** -ая, -ое минуслы; **ми́нусовая температу́ра** минуслы температура

**МИНУ́ТА** *ж*; *в разн. знач.* минут; **пять мину́т** биш минут; **ни на мину́ту не забыва́ть** бер минутҡа ла онотоп тора алмау; **мину́ты ра́дости** шатлыҡ минуттары ♦ **в одну́ мину́ту** минут эсендә; **мину́та в мину́ту** теүәл, үҙ ваҡытында; **с мину́ты на мину́ту** тиҙҙән, бына-бына; **одну́ мину́ту** бер генә минут көтөгөҙ, хәҙер; **мину́ту внима́ния** бер генә минутҡа иғтибар итегеҙ; **жить мину́той** бөгөнгөһө менән йәшәү; **без пяти́ мину́т** тиҙҙән; **как одна́ мину́та (пройти́, пролете́ть)** бик тиҙ, һиҙмәйенсә лә ҡалыу

**МИНУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** минут ...ы; **мину́тная стре́лка часо́в** сәғәттең минут теле **2.** минутлыҡ; **мину́тный переры́в** бер минутлыҡ тәнәфес **3.** ҡыҫҡа ваҡытлы, тиҙ үтеүсән; **мину́тная встре́ча** ҡыҫҡа ваҡытлы осрашыу ♦ **мину́тное де́ло** бер минутлыҡ (еңел) эш

**МИНУ́ТОЧКА** *ж*; *ласк. от* **мину́та**

**МИНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **минова́ть** 1, 3; **2.** *кому* (*о возрасте*) тулыу, тулып уҙыу (үтеү); **ему́ мину́ло пятьдеся́т лет** уға илле йәш тулды (тулып үтте)

**МИОКА́РД** *м*; *анат.* миокард (*йөрәк ите*); **инфа́ркт миока́рда** миокард (йөрәк) инфаркты

**МИОКАРДИ́Т** *м*; *мед.* миокардит, йөрәк ауырыуы; **боле́ть миокарди́том** йөрәк ауырыуы менән сирләү

**МИР I** *м* **1.** ғаләм, донъя, йыһан; **происхожде́ние ми́ра** донъяның барлыҡҡа килеүе **2.** (*земной шар*) донъя, Ер йөҙө; **изве́стие облете́ло весь мир** хәбәр бөтә донъяға таралды **3.** (*люди*) халыҡ, кешелек донъяһы, ил; **всем ми́ром реша́ть** бөтә ил менән хәл итеү **4.** (*сфера жизни или область явлений в природе*) донъя; **ста́рый мир** иҫке донъя; **артисти́ческий мир** артистар донъяһы; **живо́тный мир** хайуандар донъяһы; **мир плане́ты** планеталар донъяһы; **вну́тренний мир челове́ка** кешенең эске донъяһы ♦ **(всем) ми́ром** бөтә ил менән; **по́ миру пойти́** хәйерселәп йөрөү; **по́ миру пусти́ть** *кого* хәйерсегә ҡалдырыу, донъяһын туҙҙырыу; **на миру́ и смерть красна́** илдә үлем дә ҡурҡыныс түгел; **не от ми́ра сего́** был донъянан түгел, күктән төшкән (*хыялланыусы кеше тураһында*); **с ми́ру по ни́тке — го́лому руба́шка** ил төкөрһә, күл булыр

**МИР II** *м* **1.** татыу(лыҡ), дуҫ(лыҡ); **жить в ми́ре** татыу(лыҡта) йәшәү **2.** именлек, тыныслыҡ; **борьба́ за мир** тыныслыҡ өсөн көрәш **3.** килешеү, солох; **подписа́ть мир** солохҡа ҡул ҡуйыу **4.** тыныслыҡ, тынлыҡ; **тишина́ и мир ве́чера** кис(тең) тынлығы һәм тыныслығы ♦ **мир до́му сему́** йортоғоҙ иҫән-имен булһын; **мир пра́ху** *чьему* ауыр тупрағы еңел булһын; **с ми́ром (иди́, поезжа́й)** юлың тыныс (хәйерле) булһын; **с ми́ром отпусти́ть** *кого* язаһыҙ ҡалдырыу

**МИРА́Б** *м* мираб (*Урта Азияла һуғарыу системаһын, һыу файҙаланыу тәртибен ҡараусы кеше*)

**МИРА́Ж** *м* **1.** сағым, һағым, монар; **мира́ж в пусты́не** сүлдәге сағым **2.** *перен.* хыял; **мира́ж любви́** мөхәббәт хыялы

**МИРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое сағым ...ы; **мира́жные явле́ния** сағым күренештәре

**МИРЗА́** *м* мирза (*ҡайһы бер көнсығыш халыҡтарында юғары ҡатлам кешеһе*)

**МИРИА́ДЫ** *только мн.*; *книжн.* иҫәпһеҙ (һанһыҙ, бөткөһөҙ) күп; **мириа́ды звёзд** иҫәпһеҙ күп йондоҙҙар

**МИРИ́ТЬ** *несов. кого-что* килештереү, яраштырыу, татыулаштырыу; **мири́ть отца́ с сы́ном** ата менән улды яраштырыу

**МИРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *с кем-чем* и *без доп.* килешеү, ярашыу, татыулашыу **2.** *с чем* килешеү, килешеп ҡарау, риза булыу, ҡаршы килмәү, күнеү; **мири́ться с усло́виями жи́зни** тормош шарттарына күнеү

**МИ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыныс; **ми́рный челове́к** тыныс кеше; **ми́рный хара́ктер** тыныс холоҡ; **ми́рное вре́мя** тыныс ваҡыт; **в ми́рных усло́виях** тыныс шарттарҙа **2.** (*не враждебный*) дуҫтарса, тыныс; **ми́рный спор** дуҫтарса бәхәс; **ми́рная бесе́да** тыныс әңгәмә **3.** тыныслыҡ һөйөүсе; **ми́рное госуда́рство** тыныслыҡ һөйөүсе дәүләт **4.** тыныслыҡ тураһындағы; **ми́рный догово́р** тыныслыҡ тураһындағы килешеү; **ми́рные перегово́ры** тыныслыҡ тураһында һөйләшеүҙәр

**МИ́РО** *с*; *церк.* миро (*христиандарҙа ҡайһы бер дини байрамдарҙа һөртөлгән хуш еҫле май*) ♦ **одни́м ми́ром ма́заны** *шутл.* бер ҡалыптан һуғылған

**МИРОВОЗЗРЕ́НИЕ** *с* донъяға ҡараш; **материалисти́ческое мировоззре́ние** донъяға материалистик ҡараш

**МИРОВОЗЗРЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое донъяға ҡараш ...ы; **мировоззре́нческие пробле́мы** донъяға ҡараш проблемалары

**МИРОВО́Й I,** -ая, -ое **1.** ғаләм ...ы, йыһан ...ы; **мирово́е простра́нство** йыһан киңлеге **2.** донъя ...ы, бөтә донъя ...ы; **мирово́й ры́нок** донъя баҙары; **мирова́я война́** бөтә донъя һуғышы; **мирова́я исто́рия** донъя тарихы **3.** донъя күләмендәге; **мирово́й реко́рд** донъя күләмендәге рекорд **4.** донъяға танылған, данлыҡлы; **учёный с мировы́м и́менем** исеме донъяға танылған ғалим **5.** *прост.* шәп, бына тигән; **мирово́й па́рень** шәп егет ♦ **мирова́я скорбь** *ирон.* саманан тыш төшөнкөлөк, пессимизм

**МИРОВО́Й II,** -ая, -ое **1.** татыу, (үҙ-ара) килешеп эшләнгән; **мирова́я сде́лка** килешеп эшләнгән эш **2.** *в знач. сущ.* **мирова́я** *ж*; *разг.* ярашыу; **пойти́ на мирову́ю** ярашыуға риза булыу ♦ **мирово́й судья́** мировой судья (*Рәсәйҙә һәм ҡайһы бер илдәрҙә ваҡ-төйәк эштәрҙе ҡараусы судья*); **мирово́й посре́дник** яраштырыу аралашсыһы (*XIX б. Рәсәйҙә крәҫтиәндәр менән алпауыттар араһындағы ергә бәйләнешле бәхәсте ҡараусы*); **мирово́й суд** мировой суд (*Рәсәйҙә һәм ҡайһы бер илдәрҙә граждан-лыҡ эштәрен ҡараған суд*)

**МИРОЕ́Д** *м*; *уст.* байғура, иҙеүсе, талаусы, мирәйет; **нанима́ться к мирое́ду** мирәйеткә ялланыу

**МИРОЗДА́НИЕ** *с*; *книжн.* ғаләм, йыһан; **о́бщая карти́на мирозда́ния** йыһандың дөйөм күренеше

**МИРОЛЮ́БЕЦ** *м* тыныслыҡ һөйөүсе (яҡлы)

**МИРОЛЮБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыныслыҡ яҡлы (һөйөүсе); **миролюби́вый наро́д** тыныслыҡ һөйөүсе халыҡ **2.** тыныслыҡ һөйөү ...ы; **миролюби́вая поли́тика** тыныслыҡ һөйөү сәйәсәте

**МИРОЛЮ́БИЕ** *с* тыныслыҡ һөйөү, тыныслыҡҡа ынтылыу; **миролю́бие просты́х люде́й** ябай халыҡтың тыныслыҡҡа ынтылыуы

**МИРООЩУЩЕ́НИЕ** *с* тирә-йүнгә мөнәсәбәт, ысынбарлыҡты тойоу (һиҙеү); **измени́ть своё мироощуще́ние** үҙеңдең тирә-йүнгә мөнәсәбәтеңде үҙгәртеү

**МИРОПОНИМА́НИЕ** *с* донъяны аңлау, тирә-йүнде (ысынбарлыҡты) аңлау, ысынбарлыҡты төшөнөү

**МИРОСОЗЕРЦА́НИЕ** *с* донъяға ҡараш; **миросозерца́ние учёного** ғалимдың донъяға ҡарашы

**МИРОТВО́РЕЦ** *м* тыныслыҡ һаҡлаусы, тыныслыҡ урынлаштырыусы; **взять на себя́ роль миротво́рца** үҙеңә тыныслыҡ урынлаштырыусы ролен алыу

**МИ́РРА** *ж* мирра (*ҡайһы бер тропик ағас ҡабығында булған хуш еҫле ыҫмала — медицинала ҡулланыла*); **благово́нная ми́рра** хуш еҫле мирра

**МИРТ** *м* и **МИ́РТА** *ж* мирт (*хуш еҫле сәскәле мәңге йәшел ҡыуаҡ йәки ағас*); **цветёт мирт** мирт сәскә ата

**МИ́СКА** *ж* сеүәтә, туҫтаҡ; **глубо́кая ми́ска** тәрән туҫтаҡ

**МИСС** *ж нескл.* мисс, туташ

**МИССИОНЕ́Р** *м* миссионер (*дин таратыу өсөн ебәрелгән кеше*)

**МИССИОНЕ́РСТВО** *с* миссионерлыҡ; **занима́ться миссионе́рством** миссионерлыҡ менән шөғөлләнеү

**МИ́ССИС** *ж нескл.* миссис, ханым

**МИ́ССИЯ** *ж*; *в разн. знач.* миссия; **моя́ ми́ссия — переда́ть вам письмо́** минең миссиям һеҙгә хат тапшырыуҙан тора; **высо́кая ми́ссия иску́сства** сәнғәттең бөйөк миссияһы; **па́пские ми́ссии** папа миссиялары

**МИ́СТЕР** *м* мистер, әфәнде

**МИСТЕ́РИЯ** *ж* мистерия (*Урта быуатта Көнбайыш Европала Библия сюжетына ҡоролған дини драма*)

**МИ́СТИК** *м* мистик (*мистикаға бирелеүсән кеше*; *мистицизм яҡлы кеше*)

**МИ́СТИКА** *ж* мистика (**1.** *тәбиғи булмаған нәмәләргә, мөғжизәгә ышаныу* **2.** *күсм., һөйл. серле, аңлашылмаған йәки һис аңлатып булмаған нәмә*); **средневеко́вая ми́стика** урта быуат мистикаһы

**МИСТИФИКА́ТОР** *м*; *книжн.* мистификатор, мистификация менән шөғөлләнеүсе; **име́ть репута́цию отли́чного мистифика́тора** бик яҡшы мистификатор булыу

**МИСТИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* мистификация (*кешене яҙлыҡтырыу, хата фекергә төшөрөү*)

**МИСТИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. кого-что* и *без доп.*; *книжн.* мистификациялау, юрамал алдау

**МИСТИЦИ́ЗМ** *м* мистицизм (*мистикаға нигеҙләнгән ҡараш*)

**МИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** мистика ...ы, мистицизм ...ы; **мисти́ческая се́кта** мистика сектаһы; **мисти́ческая тео́рия** мистицизм теорияһы **2.** *перен.* мистик, серле, аңлайышһыҙ; **мисти́ческие бре́дни** мистик һаташыуҙар

**МИ́ТИНГ** *м* митинг; **предвы́борный ми́тинг** һайлау алды митингыһы

**МИТИНГОВА́ТЬ** *несов.*; *разг.* митинг үткәреү, митингыла ҡатнашыу; **митингова́ть на пло́щади** майҙанда митинг үткәреү

**МИТКА́ЛЕВЫЙ,** -ая, -ое миткал; **митка́левый плато́к** миткал яулыҡ

**МИТКА́ЛЬ** *м* миткал (*туҡыма*); **руба́ха из митка́ля** миткал күлдәк

**МИ́ТРА** *ж* митра (*руханиҙарҙың баш кейеме*)

**МИТРОПОЛИ́Т** *м* митрополит (*православие динендә юғары дини дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше*)

**МИФ** *м*; *прям., перен.* миф

**МИФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *прям., перен.* мифик; **мифи́ческий сюже́т** мифик сюжет; **мифи́ческая ли́чность** мифик шәхес

**МИФОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое мифология ...ы; **мифологи́ческий о́браз** мифологик образ

**МИФОЛО́ГИЯ** *ж* мифология (**1.** *мифтар йыйылмаһы* **2.** *мифтарҙы өйрәнеү фәне*)

**МИ́ЧМАН** *м*; *мор.* мичман

**МИ́ЧМАНКА** *ж*; *разг.* мичманка (*козырёклы мичмандар фуражкаһы*)

**МИ́ЧМАНСКИЙ,** -ая, -ое мичман ...ы; **ми́чманское зва́ние** мичман дәрәжәһе

**МИШЕ́НЬ** *ж*; *прям., перен.* сәп; **стрельба́ по мише́ни** сәпкә атыу; **стать мише́нью для насме́шек** мыҫҡыллау өсөн сәп булыу

**МИ́ШКА** *м*; *разг.* **1.** айыу **2.** (*игрушка*) айыу; **плю́шевый ми́шка** плюш айыу

**МИШУРА́** *ж* **1.** уҡа; **генера́льские пого́ны с мишуро́й** уҡалы генерал погондары **2.** *перен.* яһалма ялтырауыҡ; **мишура́ жи́зни** тормоштоң яһалма ялтырауығы

**МИШУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡа ...ы; **мишу́рное произво́дство** уҡа етештереү **2.** уҡалы; **мишу́рная парча́** уҡалы барса **3.** *перен.* ялған, яһалма; **мишу́рный блеск** ялған ялтырауыҡ

**МЛАДЕ́НЕЦ** *м*; *прям., перен.* бала, бәпес, сабый; **грудно́й младе́нец** имсәк бала; **новорождённый младе́нец** яңы тыуған бала; **су́щий младе́нец** ул нәҡ (хәс, тап) сабый бала һымаҡ, ҡарт бәпес

**МЛАДЕ́НЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** йәш бала, бәпес, сабый; **младе́нческий во́зраст** сабый саҡ **2.** *перен.* сабый, сабыйҙарса, бер ҡатлы, сабый йәнле; **младе́нческая улы́бка** сабыйҙарса йылмайыу ♦ **младе́нческий ле́пет** мәғәнәһеҙ, нигеҙһеҙ һөйләү

**МЛАДЕ́НЧЕСТВО** *с* сабыйлыҡ, балалыҡ, сабый саҡ; **охра́на матери́нства и младе́нчества** әсәлекте һәм балалыҡты һаҡлау

**МЛАДОПИ́СЬМЕННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* йәш яҙыулы (яҙмалы) (*күптән түгел генә яҙма телгә эйә булған*); **младопи́сьменные языки́** йәш яҙмалы телдәр

**МЛА́ДШИЙ,** -ая, -ее **1.** (*по возрасту*) йәш, кесе, кинйә; **мла́дшее поколе́ние** йәш быуын; **мла́дший сын** кесе ул; **мла́дший брат** ҡусты; **мла́дшая сестра́** һеңле **2.** (*по службе*) кесе; **мла́дший лейтена́нт** кесе лейтенант; **мла́дший нау́чный сотру́дник** кесе ғилми хеҙмәткәр **3.** (*о классе, курсе*) башланғыс, түбәнге; **мла́дшие кла́ссы** башланғыс кластар; **мла́дший курс** түбәнге курс

**МЛЕКОПИТА́ЮЩИЕ** *мн.* (*ед.* **млекопита́ющее** *с*); *зоол.* имеҙеүселәр, һөтимәрҙәр

**МЛЕТЬ** *несов.* **1.** иҙрәү, иҙрәп төшөү, ойоп китеү **2.** ҡатыу, иҫ юғалтыу; **млеть от у́жаса** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу **3.** *разг.* ойоу; **мле́ют но́ги от хо́лода** һалҡындан аяҡтар ойой

**МЛЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт.* һөт һымаҡ ♦ **мле́чный сок** һөт һымаҡ һут (*үҫемлек һуты*); **Мле́чный Путь** *астр.* Ҡош Юлы

**МНЕМО́НИКА** *ж* мнемоника (*хәтерҙә ҡалдырыуҙы еңеләйтеү ҡағиҙәһе һәм юлдары*)

**МНЕМОНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое мнемоника ...ы; **мнемони́ческие приёмы** мнемоника алымдары

**МНЕМОТЕ́ХНИКА** *ж см.* **мнемо́ника**

**МНЕ́НИЕ** *с* уй, фекер; **обще́ственное мне́ние** йәмәғәтселек фекере; **предвзя́тость мне́ния** ал-

дан тыуған фекер; **быть того́ же мне́ния** шул уҡ фекерҙә булыу

**МНИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** уйҙырма, буш, ысын булмаған; **мни́мая опа́сность** ысын булмаған ҡурҡыныс **2.** ялған, хәйләле; **мни́мый друг** ялған дуҫ ♦ **мни́мые чи́сла** *мат.* уйланма һандар

**МНИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* урынһыҙ шикләнеү (шомланыу), шиккә бирелеү, шикселлек; **страда́ть мни́тельностью** шикселлек менән интегеү

**МНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое юҡтан шикләнеүсән, шиксел; **мни́тельный челове́к** шиксел кеше

**МНО́ГИЙ,** -ая, -ое **1.** *только мн.* күп, ишле; **прошли́ мно́гие го́ды** күп йылдар үтте **2.** *в знач. сущ.* **мно́гие** *мн.* күптәр; **мно́гие так ду́мают** күптәр шулай уйлай **3.** *в знач. сущ.* **мно́гое** *с* күп, бик күп (*нәмәләр, фекерҙәр һ.б.*); **поговори́ть о мно́гом** күп нәмә тураһында һөйләшеп алыу

**МНО́ГО** *нареч.* **1.** күп; **мно́го рабо́тать** күп эшләү **2.** *в знач. числ.* күп; **мно́го лет прошло́** күп йыл(дар) үтте **3.** (*при сравн. ст. прил. в значении "гораздо", "значительно"*) күпкә, күп тапҡырға; **мно́го лу́чше** күпкә яҡшыраҡ; **мно́го ме́ньше** күп тапҡырға әҙерәк ♦ **по мно́гу** күпләп; **мно́го-мно́го** иң күбендә, күп тигәндә; **ни мно́го ни ма́ло** күп тә түгел, әҙ ҙә түгел; байтаҡ; **мно́го воды́ утекло́** күп(ме) ғүмер үтте, күп(ме) һыу аҡты; **мно́го со́ли съесть** *с кем* оҙаҡ ваҡыт бергә йәшәү, йыш аралашыу

**МНОГО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "күп" мәғәнәһендәге беренсе өлөшө, мәҫ.*, **многокварти́рный** күп фатирлы

**МНОГОА́КТНЫЙ,** -ая, -ое күп пәрҙәле; **многоа́ктная пье́са** күп пәрҙәле пьеса

**МНОГОБО́ЖИЕ** *с* күп аллаға ышаныу, күп аллалылыҡ

**МНОГОБО́РЕЦ** *м*; *спорт.* күп төрлө ярышта ҡатнашыусы, күпбәйгесе, многоборец

**МНОГОБО́РЬЕ** *с*; *спорт.* күп төрлө ярыш, күпбәйге, многоборье; **заня́ть пе́рвое ме́сто в многобо́рье** күпбәйгелә беренсе урын алыу

**МНОГОБРА́ЧИЕ** *с* күп ҡатын (ир) менән тороу, күп никахлылыҡ; **обы́чай многобра́чия у дре́вних племён** боронғо ҡәбиләләрҙең күп ҡатын (ир) менән тороу йолаһы

**МНОГОВА́ТО** *нареч.*; *разг.* күберәк, артығыраҡ; **многова́то запроси́ли за изгото́вленную дета́ль** эшләнгән деталгә хаҡты артығыраҡ һоранылар

**МНОГОВЕКОВО́Й,** -ая, -ое быуаттар буйына килгән, быуаттарға һуҙылған, боронғо; **многовековы́е тради́ции** быуаттар буйына килгән традициялар

**МНОГОВЛА́СТИЕ** *с* күп властылыҡ; **пери́од многовла́стия** күп властылыҡ дәүере

**МНОГОВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күп (мул) һыулы; **многово́дная река́** мул һыулы йылға **2.** (*о местности*) һыуға бай; **многово́дный край** һыуға бай яҡ

**МНОГОВО́ДЬЕ** *с* **1.** (*избыток воды*) мул һыулыҡ; **многово́дье о́зера** күлдең мул һыулығы **2.** (*период*) һыу күп ваҡыт, һыу ташҡан мәл; **пери́од многово́дья** һыу ташҡан мәл

**МНОГОГЛА́ВЫЙ,** -ая, -ое күп көмбәҙле; **многогла́вая це́рковь** күп көмбәҙле сиркәү

**МНОГОГОВОРЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее күп нәмә аңлатҡан, күп нәмә тураһында һөйләгән, мәғәнәле; **многоговоря́щие све́дения** күп нәмә тураһында һөйләгән мәғлүмәттәр; **многоговоря́щий взгляд** мәғәнәле ҡараш

**МНОГОГОЛО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** күп башлы; **многоголо́вая ги́дра** күп башлы гидра **2.** күп, ҙур (*кешеләр, хайуандар тураһында*); **многоголо́вая толпа́** ҙур төркөм

**МНОГОГРА́ННИК** *м*; *мат.* күпҡыр; **пра́вильный многогра́нник** төҙөк күпҡыр

**МНОГОГРА́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** күп ҡырлы; **многогра́нная га́йка** күп ҡырлы гайка **2.** *перен.* (*разносторонний*) күп яҡлы, киң (тәрән) белемле; **многогра́нная де́ятельность** күп яҡлы эшмәкәрлек; **многогра́нный челове́к** киң белемле кеше

**МНОГОДЕ́ТНОСТЬ** *ж* күп балалылыҡ, күп балалы булыу

**МНОГОДЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое күп балалы; **многоде́тная мать** күп балалы әсә; **многоде́тное семе́йство** күп балалы ғаилә

**МНОГОДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое күп көнлөк, оҙайлы, оҙон; **многодне́вный путь** оҙон юл

**МНОГОЖЕ́НЕЦ** *м* күп ҡатынлы ир

**МНОГОЖЁНСТВО** *с* күп ҡатынлылыҡ, күп ҡатын менән тороу

**МНОГОЖИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* күп тармаҡлы, күп тынлы; **многожи́льный ка́бель** күп тармаҡлы кабель

**МНОГОЗЕМЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күп ерле, ере күп; **многоземе́льный совхо́з** ере күп совхоз

**МНОГОЗНАЧИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* мөһимлек; **многозначи́тельность собы́тий** ваҡиғаларҙың мөһимлеге

**МНОГОЗНАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мөһим, ҙур әһәмиәтле; **многозначи́тельный факт** мөһим факт **2.** тәрән мәғәнәле; **многозначи́тельная улы́бка** тәрән мәғәнәле йылмайыу

**МНОГОЗНА́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** *мат.* күп урынлылыҡ; **многозна́чность чи́сел** һандарҙың күп урынлылығы **2.** *лингв.* күп мәғәнәлелек; **многозна́чность слов** һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге

**МНОГОЗНА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *мат.* күп урынлы; **многозна́чные чи́сла** күп урынлы һандар **2.** *лингв.* күп мәғәнәле; **многозна́чное сло́во** күп мәғәнәле һүҙ

**МНОГОКВАРТИ́РНЫЙ,** -ая, -ое күп фатирлы; **многокварти́рный дом** күп фатирлы йорт

**МНОГОКЛЕ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое *биол.* күп күҙәнәкле; **многокле́точные расте́ния** күп күҙәнәкле үҫемлектәр

**МНОГОКОВШО́ВЫЙ,** -ая, -ое *тех.* күп сүмесле; **многоковшо́вый экскава́тор** күп сүмесле экскаватор

**МНОГОКРА́СОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *полигр.* күп төрлө буяу менән баҫылған; **многокра́сочная маши́на** күп төрлө буяу менән баҫа торған машина **2.** төрлө буяулы, матур; **многокра́сочный плака́т** матур плакат **3.** *перен.* күп яҡлы, төрлө; **многокра́сочная жизнь** бай йөкмәткеле тормош

**МНОГОКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡат-ҡат, күп тапҡыр, бер нисә; **многокра́тные о́пыты** күп тапҡыр ҡабатланған тәжрибәләр **2.** *тех.* күп тапҡыр ҙурайтып күрһәткән (көсәйткән); **многокра́тный бино́кль** күп тапҡыр ҙурайтып күрһәткән бинокль; **многокра́тная анте́нна** күп тапҡыр көсәйткән антенна

**МНОГОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** күп йыллыҡ; **многоле́тняя рабо́та** күп йыллыҡ эш; **многоле́тние расте́ния** күп йыллыҡ үҫемлектәр **2.** (*о человеке*) күп йәшәгән, оло йәштәге; **многоле́тний ста́рец** күп йәшәгән ҡарт

**МНОГОЛЕ́ТНИКИ** *мн.* (*ед.* **многоле́тник** *м*); *бот.* күп йыллыҡ; **тра́вы-многоле́тники** күп йыллыҡ үләндәр

**МНОГОЛИ́КИЙ,** -ая, -ое **1.** (*о толпе*) төрлө, төрлө дәрәжәләге (кимәлдәге); **многоли́кая толпа́** төрлө халыҡ **2.** (*многообразный*) төрлө хәлваҡиғаларға бай; **многоли́кая жизнь** төрлө хәлваҡиғаларға бай тормош

**МНОГОЛЮ́ДНОСТЬ** *ж* кешенең күп булыуы, кеше (халыҡ) күплек; **многолю́дность го́рода** ҡалала кешенең күп булыуы

**МНОГОЛЮ́ДНЫЙ,** -ая, -ое күп кеше ҡатнашҡан, халҡы күп, халҡы (кешеһе) күп булған; **многолю́дное собра́ние** күп кеше ҡатнашҡан йыйылыш; **многолю́дный райо́н** халҡы күп район

**МНОГОЛЮ́ДСТВО** и **МНОГОЛЮ́ДЬЕ** *с* халыҡ (кеше) күплеге; **привы́кнуть к многолю́дству и суете́** халыҡтың күплегенә һәм ығы-зығыға өйрәнеп китеү

**МНОГОМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое күп урынлы; **многоме́стный авто́бус** күп урынлы автобус

**МНОГОМИЛЛИО́ННЫЙ,** -ая, -ое күп миллионлы, миллионлаған; **многомиллио́нное населе́ние** миллионлаған халыҡ

**МНОГОНАЦИОНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* күп милләтлелек, күп милләтле булыу; **многонациона́льность страны́** илдең күп милләтле булыуы

**МНОГОНАЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күп милләтле; **многонациона́льные госуда́рства** күп милләтле дәүләттәр

**МНОГОНАЧА́ЛИЕ** *с* етәксе күп булыу, күп (тарҡау) етәкселек

**МНОГОНО́ЖКА** *ж* күбаяҡ

**МНОГООБЕЩА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** өмөтлө; **многообеща́ющий молодо́й специали́ст** өмөтлө йәш белгес **2.** мәғәнәле, серле, ишаралы; **многообеща́ющая улы́бка** мәғәнәле йылмайыу

**МНОГООБРА́ЗИЕ** *с* төрлөлөк, күп яҡлылыҡ; **многообра́зие расти́тельного ми́ра** үҫемлектәр донъяһының төрлөлөгө; **многообра́зие жи́зни** тормоштоң күп яҡлылығы

**МНОГООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое күп төрлө, төрлө-төрлө; **многообра́зные за́пахи ле́са** урмандың төрлө-төрлө еҫтәре; **многообра́зные явле́ния** күп төрлө күренештәр

**МНОГООТРАСЛЕВО́Й,** -ая, -ое күп тармаҡлы; **многоотраслево́е хозя́йство** күп тармаҡлы хужалыҡ

**МНОГОПЛА́НОВЫЙ,** -ая, -ое күп планлы; **многопла́новое произведе́ние** күп планлы әҫәр

**МНОГОПО́ЛЬЕ** *с*; *с.-х.* күп баҫыулылыҡ

**МНОГОПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* күп баҫыулы; **многопо́льный севооборо́т** күп баҫыулы сәсеү әйләнеше

**МНОГОПРОГРА́ММНЫЙ,** -ая, -ое күп программалы; **многопрогра́ммное веща́ние** күп программалы тапшырыу

**МНОГОРЕЧИ́ВОСТЬ** *ж* күп һүҙлелек, күп һүҙле булыу; **многоречи́вость ора́тора** ораторҙың күп һүҙле булыуы

**МНОГОРЕЧИ́ВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **многосло́вный**

**МНОГОСЕМЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ҙур (ишле) ғаиләле

**МНОГОСЕРИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое күп сериялы; **многосери́йный фильм** күп сериялы фильм

**МНОГОСЛО́ВИЕ** *с* и **МНОГОСЛО́ВНОСТЬ** *ж* күп һүҙлелек; **многосло́вие в вы́водах** һығымталарҙа күп һүҙлелек; **многосло́вность расска́за** хикәйәнең күп һүҙлелеге

**МНОГОСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое күп һүҙле, һөйләнсәк; **многосло́вная речь** күп һүҙле телмәр; **многосло́вный челове́к** һөйләнсәк кеше

**МНОГОСЛО́ЖНЫЙ I,** -ая, -ое күп ижекле; **многосло́жное сло́во** күп ижекле һүҙ

**МНОГОСЛО́ЖНЫЙ II,** -ая, -ое бик (үтә) ҡатмарлы; **многосло́жные обстоя́тельства** үтә ҡатмарлы хәлдәр

**МНОГОСЛО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое күп ҡатлы, ҡатлы-ҡатлы; **многосло́йные го́рные поро́ды** ҡатлы-ҡатлы тау тоҡомдары

**МНОГОСТЕПЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое күп баҫҡыслы

**МНОГОСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** *мат.* күп ҡырлы (яҡлы); **многосторо́нняя при́зма** күп ҡырлы призма **2.** күп яҡлы; **многосторо́нний догово́р** күп яҡлы килешеү **3.** (*разносторонний*) киң, күп яҡлы; **многосторо́ннее образова́ние** күп яҡлы белем

**МНОГОСТРАДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (күп) яфа сиккән, ғазап (михнәт) күргән, ҡайғы-хәсрәт ки-

сергән, күп михнәтле, ҡайғы-хәсрәтле; **многострада́льная земля́** яфа сиккән ер

**МНОГОСТУПЕ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое күп баҫҡыслы, күп быуынлы; **многоступе́нчатая раке́та** күп быуынлы ракета

**МНОГОТИРА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое күп тиражлы; **многотира́жная газе́та** күп тиражлы гәзит

**МНОГОТО́МНЫЙ,** -ая, -ое күп (бер нисә) томлы

**МНОГОТО́ННЫЙ,** -ая, -ое күп тонналы

**МНОГОТО́ЧИЕ** *с*; *грам.* күп нөктә

**МНОГОТРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* бик ауыр, ҡыйын; **многотру́дная жизнь** бик ауыр тормош

**МНОГОТЫ́СЯЧНЫЙ,** -ая, -ое меңләгән, меңәрләгән; **многоты́сячный ми́тинг** меңәрләгән кеше ҡатнашҡан митинг

**МНОГОУВАЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое ҡәҙерле, хөрмәтле

**МНОГОУГО́ЛЬНИК** *м* күпмөйөш

**МНОГОУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күп мөйөшлө

**МНОГОЦВЕТКО́ВЫЙ,** -ая, -ое *бот.* күп сәскәле; **многоцветко́вая ро́за** күп сәскәле роза

**МНОГОЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төрлө төҫтәге, сыбар; **многоцве́тный плато́к** сыбар яулыҡ **2.** *полигр.* төрлө буяу менән баҫылған

**МНОГОЧИ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое күп һанлы, күп һандағы, бик күп; **многочи́сленный отря́д** күп һанлы отряд; **многочи́сленная родня́** күп һанлы нәҫел-нәсәп; **многочи́сленные фа́кты** бик күп факт

**МНОГОЧЛЕ́Н** *м*; *мат.* күпбыуын

**МНОГОЧЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *мат.* күп быуынлы; **многочле́нное выраже́ние** күп быуынлы аңлатма

**МНОГОЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое күп ҡатлы; **многоэта́жный дом** күп ҡатлы йорт

**МНОГОЯЗЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое күп телле, төрлө телдә һөйләшкән; **многоязы́чный слова́рь** күп телле һүҙлек; **многоязы́чное населе́ние** төрлө телдә һөйләшкән халыҡ

**МНО́ЖЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое күп, бик күп ♦ **мно́жественное число́** *грам.* күплек һан

**МНО́ЖЕСТВО** *с* **1.** күп, күплек; **мно́жество люде́й** күп халыҡ; **здесь налицо́ мно́жество фа́ктов** бында факттарҙың күплеге күренеп тора; **и́ми со́брано мно́жество фа́ктов** улар тарафынан күп факт йыйылған **2.** *мат.* күплек; **тео́рия мно́жеств** күплек теорияһы

**МНО́ЖИМОЕ** *с*; *мат.* ҡабатланыусы

**МНО́ЖИТЕЛЬ** *м*; *мат.* ҡабатлаусы

**МНО́ЖИТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое күбәйтеү ...ы; **мно́жительный аппара́т** күбәйтеү аппараты

**МНО́ЖИТЬ** *несов. что* **1.** *мат.* ҡабатлау; **мно́жить два на три** икене өскә ҡабатлау; **мно́жить в уме́** хәтерҙән ҡабатлау **2.** арттырыу, күбәйтеү, ишәйтеү

**МНО́ЖИТЬСЯ** *несов.* **1.** артыу, күбәйеү, ишәйеү; **фа́кты мно́жатся** факттар күбәйә бара **2.** *страд. от* **мно́жить** 1

**МОБИЛИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое мобилизация ...ы; **мобилизацио́нная гото́вность** мобилизация әҙерлеге; **мобилизацио́нный пункт** мобилизация пункты

**МОБИЛИЗА́ЦИЯ** *ж*; *прям.*, *перен.* мобилизация, мобилизациялау; **всео́бщая мобилиза́ция** дөйөм мобилизация

**МОБИЛИЗО́ВАННОСТЬ** *ж* тулы әҙерлек

**МОБИЛИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **мобилизова́ть 2.** *в знач. сущ.* **мобилизо́ванный** *м* мобилизацияланған (кеше)

**МОБИЛИЗОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. кого-что*; *прям.*, *перен.* мобилизациялау, йәлеп итеү, мобилизация яһау; **мобилизова́ть враче́й** врачтарҙы мобилизациялау; **мобилизова́ть люде́й на сельхозрабо́ты** кешеләрҙе ауыл хужалығы эштәренә йәлеп итеү

**МОБИЛИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* мобилизацияланыу; **мобилизова́ться на рабо́ту** эшкә мобилизацияланыу **2.** *несов. страд. от* **мобилизова́ть**

**МОБИ́ЛЬНОСТЬ** *ж* (тиҙ) хәрәкәтсәнлек, мобиллек; **моби́льность войсковы́х часте́й** ғәскәри частарҙың тиҙ хәрәкәтсәнлеге

**МОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (тиҙ) хәрәкәтсән, мобиль; **моби́льные войска́** хәрәкәтсән ғәскәр

**МОГИКА́НЕ** *мн.* могикандар (*Төньяҡ Америкалағы индеецтарҙың юғалып ҡалған ҡәбиләһе*) // *ед.* **могика́нин** *м* могикан ир-аты; **могика́нка** *ж* могикан ҡатын-ҡыҙы ♦ **после́дний из могика́н** һуңғы могикан (*бөтөп барған күренештең, социаль төркөмдөң һ.б. һуңғы вәкиле*)

**МОГИ́ЛА** *ж* ҡәбер, ҡәберлек, гүр ♦ **бра́тская моги́ла** шәһиттәр ҡәбере; **до (са́мой) моги́лы** үлгәнсе, үлем түшәгенәсә; **свести́ в моги́лу** *кого* үлем сигенә еткереү; **смотре́ть (гляде́ть) в моги́лу** үлемгә тура ҡарау; **(стоя́ть) одно́й ного́й в моги́ле** бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә; **быть на краю́ моги́лы** үлем алдында тороу

**МОГИ́ЛЬНИК** *м* боронғо ҡәберлек

**МОГИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡәбер ...ы; **моги́льная плита́** ҡәбер ташы; **моги́льная тишина́** ҡәбер тынлығы

**МОГИ́ЛЬЩИК** *м* **1.** ҡәбер ҡаҙыусы **2.** *зоол.* үләкһә ҡуңыҙы

**МОГУ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡеүәтле, ҡөҙрәтле, көслө; **могу́чая страна́** ҡеүәтле ил; **могу́чий органи́зм** көслө организм **2.** бик йыуан, мөһабәт, ныҡ; **могу́чий дуб** мөһабәт имән

**МОГУ́ЩЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡеүәтле, ҡөҙрәтле, бик көслө; **могу́щественная страна́** ҡеүәтле ил; **могу́щественное сре́дство** бик көслө сара

**МОГУ́ЩЕСТВО** *с* ҡеүәт, ҡөҙрәт, көс; **могу́щество госуда́рства** дәүләттең ҡеүәте

**МО́ДА** *ж* **1.** мода; **быть оде́тым по после́дней мо́де** һуңғы мода буйынса кейенеү; **войти́ в мо́ду** модаға инеү; **журна́л мод** модалар журналы **2.** *прост.* (*привычка*) ғәҙәт; **что́ это за мо́да** был ниндәй ғәҙәт

**МОДА́ЛЬНОСТЬ** *ж*; *лингв.* мөнәсәбәтлек, модаллек

**МОДА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* мөнәсәбәт, модаль; **мода́льные глаго́лы** мөнәсәбәт ҡылымдар

**МОДЕЛИ́РОВАНИЕ** *с см.* **модели́ровать**

**МОДЕЛИ́РОВАТЬ** *несов. что* модель әҙерләү; **модели́ровать пла́тье** күлдәктең моделен әҙерләү

**МОДЕЛИ́СТ** *м* и **МОДЕЛИ́СТКА** *ж* моделсе, моделдәр яһаусы

**МОДЕ́ЛЬ** *ж*; *в разн. знач.* модель; **моде́ль пла́тья** күлдәк моделе; **но́вая моде́ль автомоби́ля** автомобилдең яңы моделе

**МОДЕЛЬЕ́Р** *м* модельер; **моделье́р да́мского пла́тья** ҡатын-ҡыҙ күлдәге модельеры

**МОДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** модель ...ы, моделдәр; **моде́льный цех** моделдәр цехы **2.** моделле; **моде́льные ту́фли** моделле туфлиҙар

**МОДЕ́ЛЬЩИК** *м* моделдәр яһаусы

**МОДЕ́ЛЬЩИЦА** *ж* **1.** моделдәр яһаусы (*ҡатын-ҡыҙ тураһында*) **2.** яңы эшләпә моделдәре яһаусы (*ҡатын-ҡыҙ тураһында*)

**МОДЕ́РН** *м нескл.* **1.** модерн (*XIX б. аҙағында — XX б. башында һынлы сәнғәттә һәм архитектурала үҙенән алдағы сәнғәткә ҡаршы йүнәлеш*) **2.** *в знач. неизм. прил.* модерн; **гости́ница в сти́ле моде́рн** модерн стилендәге ҡунаҡхана

**МОДЕРНИЗА́ЦИЯ** *ж* и **МОДЕРНИЗИ́РОВАНИЕ** *с см.* **модернизи́ровать**

**МОДЕРНИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* модернизациялау, яңылыҡ индереү, яңыса ҡороу; **модернизи́ровать технологи́ческие проце́ссы** технология процестарын модернизациялау

**МОДЕРНИЗИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.* модернизацияланыу, яңырыу; **архитекту́ра модернизи́ровалась** архитектура яңырҙы **2.** *несов. страд. от* **модернизи́ровать**

**МОДЕРНИ́ЗМ** *м*; *иск.* модернизм (*үткән дәүер сәнғәтенә ҡаршы йүнәлеш, XIX б. аҙағында — XX б. башында барлыҡҡа килә*)

**МОДЕРНИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. см.* **модернизи́ровать**

**МОДЕРНИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов. см.* **модернизи́роваться 2.** *несов. страд. от* **модернизова́ть**

**МОДЕРНИ́СТ** *м*; *иск.* модернист, модернизм яҡлы

**МОДЕРНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое модернизм ...ы, модернист ...ы; **moderни́стские увлече́ния** модернизм менән мауығыу; **модерни́стский кружо́к** модернистар түңәрәге

**МОДИФИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* модификация ...ы; **модификацио́нные явле́ния** модификация күренештәре

**МОДИФИКА́ЦИЯ** *ж*; *книжн.* модификация (**1.** *үҙгәреү, башҡа төргә әйләнеү* **2.** *үҙгәргән, башҡа төргә ингән әйбер*); **модифика́ция чугуна́** суйындың модификацияһы; **алма́з и графи́т явля́ются модифика́циями углеро́да** алмас менән графит углерод модификацияларынан һанала

**МОДИФИЦИ́РОВАНИЕ** *с*; *книжн. см.* **модифици́ровать**

**МОДИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *книжн.* модификациялау, модификация яһау, үҙгәртеү; **модифици́ровать га́зы** газдарҙы модификациялау

**МОДИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** *книжн.* **1.** *сов., несов.* модификацияланыу, үҙгәреү; **газ модифици́руется и превраща́ется в жи́дкость** газ модификациялана һәм шыйыҡлыҡҡа әйләнә **2.** *несов. страд. от* **модифици́ровать**

**МО́ДНИК** *м* и **МО́ДНИЦА** *ж*; *разг.* модаға эйәреүсе, мода ҡоло

**МО́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* мода артынан ҡыуыу, модаға эйәреү, модалы кейенеү; **мо́дничать, несмотря́ на прекло́нный во́зраст** олоғайыуға ҡарамаҫтан, мода артынан ҡыуыу

**МО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** модалы; **мо́дный костю́м** модалы костюм; **мо́дная причёска** модалы причёска **2.** киң билдәле, киң таралған; **мо́дный писа́тель** бөгөнгө көндә киң билдәле яҙыусы; **мо́дная пе́сенка** бөгөнгө көндә киң таралған йыр **3.** модаға эйәргән; **мо́дная же́нщина** модаға эйәргән ҡатын-ҡыҙ **4.** мода(лар) ...ы; **мо́дный журна́л** модалар журналы

**МОДУЛИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *муз.* тауыш үҙгәртеү, бер тондан икенсеһенә күсеү; **модули́ровать го́лосом** тауыш үҙгәртеү **2.** *физ.* модуляция яһау, модуляциялау; **модули́ровать ток** токты модуляциялау

**МО́ДУЛЬ** *м*; *физ., тех.* модуль (*ҡайһы бер теүәл фәндәрҙә коэффициенттар исеме*); **мо́дуль сжа́тия** ҡыҫыу модуле; **мо́дуль упру́гости** һығылмалылыҡ модуле

**МОДУЛЯ́ЦИЯ** *ж*; *в разн. знач.* модуляция; **необы́чные модуля́ции его́ го́лоса** уның тауышының модуляциялары; **модуля́ция то́ка** ток модуляцияһы

**МО́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йыуыу ...ы; **мо́ечная маши́на** йыуыу машинаһы **2.** *в знач. сущ.* **мо́ечная** *ж* йыуыу бинаһы (бүлмәһе)

**МОЁ** *с мест. см.* **мой**

**МОЖЖЕВЁЛОВЫЙ** и **МОЖЖЕВЕ́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое артыш ...ы; **можжевёловое де́рево** артыш ағасы; **можжевёловое уди́лище** артыш ҡыуалы

**МОЖЖЕВЕ́ЛЬНИК** *м* артыш

**МО́ЖНО** *в знач. сказ., безл.* мөмкин, ярай, була; **э́то мо́жно сде́лать о́чень бы́стро** быны

бик тиҙ эшләп була; **мо́жно войти́** инергә ярай ♦ **как мо́жно** мөмкин тиклем; **как мо́жно лу́чше** мөмкин тиклем яҡшыраҡ; **как э́то мо́жно**; **ра́зве мо́жно** былай ярамай бит инде, шулай яраймы ни инде; **мо́жно сказа́ть** *вводн. сл.* әйтергә мөмкин

**МОЗА́ИКА** *ж* мозаика (*төрлө төҫтәге быялан, ваҡ таштарҙан һ.б. эшләнгән һүрәт, рәсем йәки нәфис биҙәк*)

**МОЗАИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое мозаика ...ы, мозаикалы; **мозаи́ческое иску́сство** мозаика сәнғәте

**МОЗАИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мозаика ...ы; **мозаи́чная мастерска́я** мозаика оҫтаханаһы **2.** мозаикалы; **мозаи́чный сто́лик** мозаикалы өҫтәл; **мозаи́чный рису́нок** мозаикалы рәсем

**МОЗГ** *м* **1.** мейе; **головно́й мозг** баш мейеһе; **кровоизлия́ние в мозг** мейегә ҡан һауыу **2.** баш, мейе; **в э́ти мину́ты в его́ мозгу́ рожда́лись фантасти́ческие иде́и** был минуттарҙа уның башында фантастик идеялар тыуҙы ♦ **ко́стный мозг** елек, елек майы; **с мо́згом (мозга́ми)** *кто*; *прост.* аҡылы бар, аҡыллы; **до мо́зга косте́й** башынан аяғына тиклем, сиктән тыш; **впра́вить мозги́** *прост.* аҡылға ултыртыу; **шевели́ть мозга́ми** *прост.* баш ватыу, ныҡлап уйлап ҡарау; **мозги́ набекре́нь (не на ме́сте)** *у кого*; *прост.* башы эшләмәй

**МО́ЗГЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* еүеш, ямғырлы; **мо́зглый во́здух** еүеш һауа

**МОЗГОВО́Й,** -ая, -ое **1.** мейе ...ы; **мозговы́е изви́лины** мейе йыйырсыҡтары; **мозговы́е сосу́ды** мейе тамырҙары **2.** елекле; **мозгова́я кость** елекле һөйәк **3.** *перен.* аҡыл ...ы; **утоми́ться от мозгово́й рабо́ты** аҡыл хеҙмәтенән арыу ♦ **мозгово́й центр** етәкселек иткән үҙәк (*ҡатмарлы предприятие, учреждение һ.б. эшмәкәрлеге менән*)

**МОЗЖЕЧО́К** *м*; *анат.* кесе мейе, мейесә

**МОЗЖИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** һыҙлау; **мозжи́т нога́** аяҡ һыҙлай **2.** *что* и *без доп.*, *безл.* һыҙлау; **но́гу мозжи́т** аяҡ һыҙлай; **мозжи́т в коле́не** тубыҡ һыҙлай

**МОЗО́ЛИСТЫЙ,** -ая, -ое сөйәлле; **мозо́листые ру́ки** сөйәлле ҡулдар

**МОЗО́ЛИТЬ** *несов.* сөйәлләндереү; **мозо́лить ру́ки** ҡулдарҙы сөйәлләндереү ♦ **мозо́лить глаза́** *кому*; *прост.*: 1) йәнгә тейеү, йөҙәтеп бөтөрөү; 2) һәр ваҡыт күҙ алдында тороп ялҡытып бөтөрөү

**МОЗО́ЛЬ** *ж* сөйәл, һөйәл; **суха́я мозо́ль** ҡоро сөйәл ♦ **наступи́ть на (люби́мую) мозо́ль** *кому*; *прост.* ауыртҡан ергә тейеү

**МОЗО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сөйәл ...ы; **мозо́льный пла́стырь** сөйәл пластыры

**МОИ́** *мн. мест. см.* **мой**

**МОЙ** *м* (моя *ж*, моё *с*) *мест.* **1.** минең; **мой оте́ц** минең атайым; **моя́ рука́** (минең) ҡулым; **моё лицо́** (минең) йөҙөм **2.** *в знач. сущ.* **моё** *с*; *разг.* минеке; **э́то моё** был минеке **3.** *в знач. сущ.* **мои́** *мн.*; *разг.* минекеләр; **мои́х нет до́ма** минекеләр өйҙә юҡ ♦ **э́то не по мое́й ча́сти** был минең эшем түгел, быға минең ҡағылышым юҡ; **с моё** минең ҡәҙәр; **поживи́те-ка с моё** минең ҡәҙәр йәшәгеҙ әле; **бо́же мой!** йә алла!

**МО́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **мыть**; **мо́йка посу́ды** һауытһаба йыуыу **2.** (*машина*) йыуыу машинаһы; **мо́йка для ше́рсти** йөн йыуыу машинаһы

**МО́ЙЩИК** *м* йыуыусы; **мо́йщик маши́н** машина йыуыусы

**МОКАСИ́НЫ** *мн.* (*ед.* **мокаси́н** *м*) мокасин (*аяҡ кейеме*)

**МО́ККО** *с нескл.* **1.** мокко (*ҡәһүәнең ҡиммәтле төрө*); **пить мо́кко** мокко эсеү **2.** *в знач. прил.* мокко ...ы; **ко́фе мо́кко** мокко ҡәһүәһе

**МО́КНУТЬ** *несов.* **1.** сыланыу, һыуланыу, еүешләнеү; **мо́кнуть под дождём** ямғырға сыланыу **2.** (*о ране, лишаях и т.п.*) сейләнеп эренләү; **ра́на мо́кнет** йәрәхәт сейләнеп эренләй

**МОКРЕ́Ц** *м*; *вет.* иҙелмә, бысылғы

**МОКРИ́ЦА** *ж* ҡырҡаяҡ (*бөжәк*)

**МОКРО́ТА** *ж*; *мед.* ҡаҡырыҡ

**МОКРОТА́** *ж*; *разг.* еүешлек, дым, дымлылыҡ; **дождь то́лько увели́чивал сы́рость и мокроту́** ямғыр дым менән еүешлекте арттырҙы ғына

**МО́КРЫЙ,** -ая, -ое еүеш, епшек; **мо́края оде́жда** еүеш кейем; **мо́крые ру́ки** еүеш ҡулдар; **мо́крый снег** епшек ҡар; **пого́да стои́т мо́края** көндәр епшек ♦ **глаза́ на мо́кром ме́сте** иларға ғына тора; **мо́края ку́рица** ебегән мәхлүк, булдыҡһыҙ (кеше)

**МО́КША** *ж собир.* муҡшылар

**МОКША́НЕ** *мн.* муҡшылар, муҡшы халҡы // *ед.* **мокша́нин** *м* муҡшы ир-аты; **мокша́нка** *ж* муҡшы ҡатын-ҡыҙы

**МОКША́НСКИЙ,** -ая, -ое муҡшы ...ы; **мокша́нский язы́к** муҡшы теле

**МОЛ I** *м*; *мор.* мол (*порттарҙа карапты тулҡындан һаҡлауға хеҙмәт иткән ҡоролма*)

**МОЛ II** *частица*; *прост.* тигән бул(ыу), тип әйт(еү), имеш, йәнәһе; **ты, мол, сам винова́т** имеш, һин үҙең ғәйепле

**МОЛВА́** *ж* хәбәр, һүҙ, имеш-мимеш; **людска́я молва́** халыҡ араһында йөрөгән һүҙ

**МОЛДАВА́НЕ** *мн.* молдавандар, молдаван халҡы // *ед.* **молдава́нин** *м* молдаван ир-аты; **молдава́нка** *ж* молдаван ҡатын-ҡыҙы

**МОЛДАВА́НСКИЙ** и **МОЛДА́ВСКИЙ,** -ая, -ое молдаван(дар) ...ы, Молдавия ...ы; **молдава́нские та́нцы** молдаван бейеүҙәре; **молда́вские пе́сни** молдаван йырҙары; **молда́вский язы́к** молдаван теле

**МОЛЕ́БЕН** *м* ғибәҙәт; **служи́ть моле́бен** ғибәҙәт ҡылыу

**МОЛЕВО́Й: молево́й сплав** *спец.* ҡыуғын

**МОЛЕ́КУЛА** *ж* молекула

**МОЛЕКУЛЯ́РНЫЙ,** -ая, -ое молекула ...ы; **молекуля́рное движе́ние** молекулалар хәрәкәте; **молекуля́рная тео́рия** молекула теорияһы

**МОЛЕ́ЛЬНЯ** *ж* ғибәҙәтхана

**МОЛЕ́НИЕ** *с*; *книжн.* **1.** *см.* **моли́ться** 1; **2.** *см.* **моли́ть**

**МОЛЕСКИ́Н** *м* молескин (*кизе-мамыҡ туҡыма*)

**МОЛИБДЕ́Н** *м* молибден (*химик элемент, металл*)

**МОЛИБДЕ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** молибден ...ы; **молибде́новые месторожде́ния** молибден яткылыҡтары **2.** молибденлы; **молибде́новая сталь** молибденлы ҡорос **3.** молибден, молибденлы; **молибде́новая про́волока** молибден сым

**МОЛИ́ТВА** *ж* доға; **чита́ть моли́тву** доға уҡыу

**МОЛИ́ТВЕННИК** *м* доғалыҡ

**МОЛИ́ТВЕННЫЙ,** -ая, -ое доға ...ы, ғибәҙәт ...ы; **моли́твенный дом** ғибәҙәт йорто; **моли́твенные слова́** доға һүҙҙәре

**МОЛИ́ТЬ** *несов. кого-что* и *без доп.* ялыныу, үтенеү, ялбарыу; **моли́ть о по́мощи** ярҙам һорап ялбарыу

**МОЛИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** намаҙ уҡыу, ғибәҙәт ҡылыу, алланан һорау **2.** *на кого*; *перен.*, *разг.* табыныу, баш эйеү, артыҡ яратыу; **моли́ться на ста́ршую сестру́** апайға табыныу

**МО́ЛКНУТЬ** *несов.* тыныу, тынып ҡалыу, туҡтау, баҫылыу; **в зно́йные часы́ мо́лкнет всё вокру́г** томрала тирә-яҡтағы бөтә нәмә тынып ҡала

**МОЛЛЮ́СКИ** *мн.* (*ед.* **моллю́ск** *м*); *зоол.* моллюск

**МОЛЛЮ́СКОВЫЙ,** -ая, -ое моллюск ...ы; **моллю́сковые ра́ковины** моллюск ҡабырсаҡтары

**МО́ЛНИЕВЫЙ,** -ая, -ое йәшен ...ы; **мо́лниевая вспы́шка** йәшен балҡыуы

**МОЛНИЕНО́СНЫЙ,** -ая, -ое йәшен тиҙлегендә, йәшен кеүек тиҙ; **с молниено́сной быстрото́й** йәшен тиҙлеге менән; **молниено́сное движе́ние** йәшен тиҙлегендәге хәрәкәт

**МОЛНИЕОТВО́Д** *м* йәшен ҡайтарғыс

**МОЛНИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* и *без доп.*; *разг.* телеграмма-молния ебәреү, телеграмма-молния менән хәбәр итеү; **молни́ровать день прие́зда** килеү көнөн телеграмма-молния менән хәбәр итеү

**МО́ЛНИЯ** *ж* **1.** йәшен; **шарова́я мо́лния** йәшен уты, йәшен тубы **2.** молния, ашығыс телеграмма, телеграмма-молния **3.** (*вид застёжки*) молния; **руба́шка с мо́лнией** молниялы күлдәк

**МОЛОДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое йәштәр ...ы; **молодёжная брига́да** йәштәр бригадаһы; **молодёжный теа́тр** йәштәр театры

**МОЛОДЁЖЬ** *ж собир.* йәштәр, йәш-елкенсәк; **ны́нешняя молодёжь** хәҙерге йәштәр

**МОЛОДЕ́ТЬ** *несов.* йәшәреү, йәшәреп китеү; **молоде́ть от сча́стья** шатлыҡтан йәшәреп китеү

**МО́ЛОДЕЦ** *м*; *фольк.* егет, батыр егет; **до́брый мо́лодец** батыр егет

**МОЛОДЕ́Ц** *м* **1.** егет, булдыҡлы егет; **бра́вый молоде́ц** батыр егет **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* (*при выражении похвалы*) егет икәнһең, шәп икәнһең; **молоде́ц, что суме́л реши́ть зада́чу пе́рвым** егет икәнһең, мәсьәләне беренсе булып эшләй алдың **3.** *в знач. нареч.* **молодцо́м** егеттәрсә, егеттәр кеүек; **сего́дня оте́ц вы́глядит молодцо́м** бөгөн атай егеттәрсә күренә ♦ **молоде́ц к молодцу́** береһенән-береһе яҡшыраҡ, бөтәһе лә һайлап алған кеүек

**МОЛОДЕ́ЦКИЙ,** -ая, -ое **1.** *фольк.* егет(тәр) ...ы; **у́даль молоде́цкая** егет ҡыйыулығы; **молоде́цкая кровь** егеттәр ҡаны; **молоде́цкое се́рдце** егеттәр йөрәге **2.** егеттәрсә, батырҙарса; **молоде́цкий вид** егеттәрсә ҡиәфәт; **молоде́цкая отва́га** егеттәрсә батырлыҡ

**МОЛОДЕ́ЧЕСТВО** *с* **1.** егетлек, батырлыҡ, ҡыйыулыҡ; **цени́ть молоде́чество** ҡыйыулыҡты юғары баһалау **2.** (*показная отвага*) ҡуҡырлыҡ, яһалма батырлыҡ (ҡыйыулыҡ); **ему́ прису́ще наи́гранное молоде́чество** уға яһалма батырлыҡ хас

**МОЛОДИ́ТЬ** *несов. кого-что* йәшәртеү, йәш күрһәтеү; **э́то пла́тье вас молоди́т** был күлдәк һеҙҙе йәш күрһәтә

**МОЛОДИ́ТЬСЯ** *несов.* йәш күренергә тырышыу, йәшәрергә тырышыу; **она́ всё ещё молоди́тся** ул һаман йәш күренергә тырыша

**МОЛОДНЯ́К** *м* **1.** *собир.* (*молодые животные*) йәш мал; (*о крупном рогатом скоте*) танаторпо; (*о лошадях*) тай-тулаҡ **2.** (*молодой лес*) йәш урман; **хво́йный молодня́к** бешәлек **3.** *собир.*; *прост.* (*молодёжь*) йәштәр, йәш-елкенсәк

**МОЛОДОЖЁНЫ** *мн.* (*ед.* **молодожён** *м*) йәштәр (*яңы өйләнешкән ир менән ҡатын*)

**МОЛОДО́Й,** -ая, -ое **1.** йәш; **молодо́е поколе́ние** йәш быуын; **молодо́й па́рень** йәш егет; **молодо́й специали́ст** йәш белгес **2.** яңы, йәш; **молодо́й ме́сяц** яңы ай; **молода́я респу́блика** йәш республика **3.** йәш ...ы, йәшлек ...ы; **молодо́й задо́р** йәшлек дәрте; **молодо́й сон** йәшлек йоҡоһо; **молодо́й го́лос** йәш тауыш; **молодо́е се́рдце** йәш йөрәк **4.** йәш, өлгөрөп етмәгән; **молодо́й кумы́с** йәш ҡымыҙ **5.** *в знач. сущ.* **молоды́е** *мн.* (*ед.* **молодо́й** *м* и **молода́я** *ж*); *разг.* яңы өйләнешкән йәштәр (*ир менән ҡатын*) ♦ **молодо́й челове́к** (*обращение*) йәш кеше; **из молоды́х да ра́нних** *кто* йәш булһа ла хәйләле (өлгөр); **мо́лодо-зе́лено** йәш, тәжрибәһеҙ (*кешегә ҡарата*)

**МО́ЛОДОСТЬ** *ж* йәшлек, йәш саҡ (ваҡыт); **го́ды мо́лодости** йәшлек йылдары ♦ **по мо́лодости лет** йәшлеге арҡаһында; **не пе́рвой мо́лодости** йәш түгел, урта йәштәге; **втора́я мо́лодость** икенсе йәшлек, олоғая төшөү



19 зак. 2.0084.05

**МОЛОДУ́ХА** *ж*; *прост.* йәш килен

**МОЛОДЦЕВА́ТЫЙ,** -ая, -ое егеттәрсә; **молодцева́тый вид** егеттәрсә ҡиәфәт

**МОЛО́ДЧИК** *м* **1.** *уст.*, *трад.-поэт.* *см.* **молоде́ц** 1; **2.** *разг.*, *презр.* йыртҡыс, ҡәбәхәт, һатлыҡ йән

**МОЛОДЧИ́НА** *м* и *ж* *см.* **молоде́ц** 2

**МО́ЛОДЬ** *ж собир.*; *зоол.* селбәрә, йотҡолоҡ; **мо́лодь выхо́дит из икри́нок** селбәрә ыуылдырыҡтан сыға

**МОЛОЖА́ВЫЙ,** -ая, -ое йәш сырай(лы) (күренгән); **моложа́вая же́нщина** йәш сырайлы ҡатын; **моложа́вый вид** йәш күренгән ҡиәфәт

**МОЛО́ЗИВО** *с* ыуыҙ; **пои́ть теля́т моло́зивом** быҙауҙарға ыуыҙ эсереү

**МОЛО́КИ** *мн.* (*ед.* **моло́ка** *ж*) балыҡ ағы

**МОЛОКО́** *с* һөт; **коро́вье молоко́** һыйыр һөтө; **ки́слое молоко́** әсегән һөт; **парно́е молоко́** яңы һауған һөт; **це́льное молоко́** өҫтө (ҡаймағы) алынмаған (айыртылмаған) һөт; **минда́льное молоко́** миндаль һөтө ♦ **молоко́ на губа́х не обсо́хло** *у кого* ауыҙында инә һөтө лә кипмәгән; **кровь с молоко́м** *см.* **кровь**

**МОЛОКОВО́З** *м* **1.** һөт ташыусы **2.** һөт ташыу машинаһы

**МОЛОКОСО́С** *м*; *разг.*, *пренебр.* маңҡа, маңҡа малай

**МО́ЛОТ** *м* **1.** ҙур сүкеш, сүкеш **2.** (*машина*) сүкеү машинаһы

**МОЛОТИ́ЛКА** *ж* ашлыҡ һуҡҡыс; **мото́рная молоти́лка** моторлы ашлыҡ һуҡҡыс

**МОЛОТИ́ЛО** *с*; *с.-х.* шыбағас туҡмағы, тәпәс

**МОЛОТИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ашлыҡ һуғыу ...ы; **молоти́льные рабо́ты** ашлыҡ һуғыу эштәре; **молоти́льный сара́й** ашлыҡ һуғыу һарайы

**МОЛОТИ́ЛЬЩИК** *м* ашлыҡ һуғыусы

**МОЛОТИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* (ашлыҡ) һуғыу; **молоти́ть рожь** арыш һуғыу **2.** *по чему*, *во что*; *перен.*, *разг.* туҡылдатыу; **молоти́ть в дверь** ишек туҡылдатыу **3.** *кого-что* туҡмау; **молоти́ли его́ кулака́ми** уны йоҙроҡ менән туҡмайҙар ине **4.** *что* и *без доп.*; *прост.* (*много говорить*) күп һөйләү, туҡтамай һөйләү

**МОЛОТИ́ТЬСЯ** *несов. страд.* от **молоти́ть** 1

**МОЛОТОБО́ЕЦ** *м* сүкешсе

**МОЛОТО́К** *м* сүкеш; **сапо́жный молото́к** итек сүкеше; **отбо́йный молото́к** вата торған сүкеш

**МОЛОТО́ЧЕК** *м* **1.** *уменьш. от* **молото́к** **2.** сүкеш; **молото́чки роя́ля** рояль сүкештәре **3.** *анат.* сүкеш һөйәге (*урта ҡолаҡтағы бәләкәй һөйәк*)

**МО́ЛОТ-РЫ́БА** *ж* сүкешбалыҡ (*диңгеҙ балығы*)

**МО́ЛОТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **моло́ть** **2.** *прил.* тартылған, төйөлгән; **мо́лотая рожь** тартылған арыш; **мо́лотый пе́рец** төйөлгән борос

**МОЛО́ТЬ** *несов.* *что* **1.** тартыу; **моло́ть пшени́цу на крупу́** бойҙайҙы ярмаға тартыу **2.** ваҡлау, онтау; **моло́ть ка́мни** таштарҙы онтау, ваҡлау **3.** *прост.* лығырлау; **моло́ть чепуху́** юҡбарҙы лығырлау

**МОЛОТЬБА́** *ж* **1.** *см.* **молоти́ть** 1; **маши́нная молотьба́** машина менән ашлыҡ һуғыу **2.** ашлыҡ һуғыу ваҡыты; **наступи́ла молотьба́** ашлыҡ һуғыу ваҡыты етте

**МОЛО́ТЬСЯ** *несов. страд.* от **моло́ть** 1, 2

**МОЛОЧА́Й** *м* һөтлөгән

**МОЛОЧА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөтлөгән ...ы; **молоча́йные ли́стья** һөтлөгән япраҡтары **2.** *в знач. сущ.* **молоча́йные** *мн.*; *бот.* һөтлөгән һымаҡтар

**МОЛО́ЧНИК** *м* **1.** һөт һауыты **2.** һөт һатыусы (*ир-ат*)

**МОЛО́ЧНИЦА** *ж* **1.** һөт һатыусы (*ҡатын-ҡыҙ*) **2.** *мед.* ауыҙ боҙолоу (*гәҙәттә, имсәк балаларҙа*)

**МОЛОЧНОКИ́СЛЫЙ,** -ая, -ое *хим.* һөт кислотаһы; **молочноки́слые бакте́рии** һөт кислотаһы бактериялары

**МОЛО́ЧНОСТЬ** *ж* һөтлө булыу, һөт биреүсәнлек; **моло́чность коро́вы** һыйырҙың һөтлө булыуы

**МОЛОЧНОТОВА́РНЫЙ,** -ая, -ое һөт етештереү һәм эшкәртеү ...ы; **молочнотова́рная фе́рма** һөт етештереү һәм эшкәртеү фермаһы

**МОЛО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һөтлө, һауын; **моло́чная коро́ва** һөтлө һыйыр; **моло́чный скот** һауын мал **2.** йәш, имсәк; **моло́чный телёнок** йәш быҙау **3.** һөтлө, һөттә бешергән; **моло́чная ка́ша** һөттә бешер(ел)гән бутҡа **4.** *в знач. сущ.* **моло́чное** *с* һөт аҙыҡтары; **он лю́бит моло́чное** ул һөт аҙыҡтары ашарға ярата **5.** һөтсөлөк ...ы; **моло́чная фе́рма** һөтсөлөк фермаһы ♦ **моло́чный брат**; **моло́чная сестра́** имсәктәш, һөт ҡәрҙәше; **моло́чные же́лезы** һөт биҙҙәре; **моло́чные зу́бы** һөт тештәре; **моло́чная ку́хня**: 1) һөт аҙыҡтары; 2) һөт аҙыҡтары кухняһы (*имсәк балаларға*)

**МО́ЛЧА** *нареч.* өндәшмәйенсә, һүҙһеҙ генә, бер һүҙһеҙ, өнһөҙ; **мо́лча смотре́ли друг на дру́га** бер-береһенә һүҙһеҙ генә ҡарап торҙолар

**МОЛЧАЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙ һүҙле, һөйләшмәүсән; **молчали́вый сосе́д** аҙ һүҙле күрше **2.** *перен.* тын, тып-тын; **молчали́вый лес** тын урман **3.** һүҙһеҙ; **молчали́вое согла́сие** һүҙһеҙ ризалашыу

**МОЛЧА́НИЕ** *с* *см.* **молча́ть**; **молча́ние — знак согла́сия** өндәшмәү — ризалыҡ билдәһе; **по́сле до́лгого молча́ния** оҙаҡ өндәшмәй торғандан һуң; **храни́ть молча́ние** тынлыҡ һаҡлау; **погрузи́ться в молча́ние** тынлыҡҡа сумыу; **прерва́ть молча́ние** тынлыҡты боҙоу

**МОЛЧА́ТЬ** *несов.* **1.** һөйләшмәү, өндәшмәү, тыныу, һүҙ ҡушмау; **молча́ть це́лый день** көнө буйы өндәшмәү **2.** тып-тын тороу, шауламау; **лес молчи́т** урман тып-тын тора **3.** эшләмәү; **ра́ция молчи́т** рация эшләмәй **4.** һөйләмәү, әйтмәү, сер

итеп һаҡлау; **об э́том ну́жно молча́ть** был турала һөйләмәҫкә кәрәк

**МОЛЧКО́М** *нареч.*; *разг.* өндәшмәйенсә, һөйләшмәйенсә, һүҙһеҙ генә, тын ғына; **наблюда́ть за ней молчко́м** уны һүҙһеҙ генә күҙәтеү

**МОЛЧО́К** *м в знач. сказ.*; *разг.* һөйләмә, әйтәһе булма, шым бул; **об э́том молчо́к** был турала әйтәһе булма

**МОЛЧУ́Н** *м*; *разг.* һөйләшмәүсән ир-ат, һөйләшмәй торған (мыштым) ир-ат; **молчу́нья** *ж*; *разг.* һөйләшмәүсән ҡатын-ҡыҙ, һөйләшмәй торған (мыштым) ҡатын-ҡыҙ; **слыть за молчуна́** һөйләшмәүсән кеше тигән дан алыу

**МОЛЬ I** *ж* көйә; **ко́мнатная моль** бүлмә көйәһе; **зернова́я моль** ашлыҡ көйәһе

**МОЛЬ II** *ж* и *м*; *спец.* **1.** ҡыуғын; **по реке́ плывёт моль** йылғанан ҡыуғын килә **2.** *в знач. нареч.* **мо́лем, мо́лью** ҡыуғынлап; **сплавля́ть лес мо́лем** ағасты ҡыуғынлап ағыҙыу

**МОЛЬБА́** *ж* ялыныу, ялбарыу; **мольба́ о поща́де** мәрхәмәт ялбарыу

**МОЛЬБЕ́РТ** *м* мольберт (*рәссам ҡулланған өстаған*); **поста́вить карти́ну на мольбе́рт** мольбертҡа картинаны ҡуйыу

**МОМЕ́НТ** *м* **1.** момент, ҡыҫҡа ваҡыт, мәл, саҡ; **подходя́щий моме́нт** уңайлы момент; **теку́щий моме́нт** хәҙерге ваҡыт **2.** яҡ, сифат; **положи́тельные моме́нты в рабо́те** эштең ыңғай яҡтары ♦ **в (оди́н) моме́нт** бик тиҙ, күҙ асып йомғансы; **в да́нный моме́нт** хәҙер; **в любо́й моме́нт** теләһә ҡасан, һәр ваҡыт

**МОМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бик тиҙ, шунда уҡ, кинәт, ҡапыл; **момента́льный сни́мок** бик тиҙ төшөрөп алынған рәсем; **момента́льная смерть** ҡапыл (кинәт) үлем

**МОНА́РХ** *м* монарх

**МОНАРХИ́ЗМ** *м* **1.** (*политическое направление*) монархизм **2.** *см.* **мона́рхия**

**МОНАРХИ́СТ** *м* монархист

**МОНАРХИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое монархист(тар) ...ы; **монархи́стский за́говор** монархистар заговоры; **монархи́стская гру́ппа** монархистар төркөмө

**МОНАРХИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое монархизм ...ы, монархиялы, монархия ...ы, монархис(тар) ...ы; **монархи́ческая власть** монархия власы; **монархи́ческое госуда́рство** монархия дәүләте

**МОНА́РХИЯ** *ж* монархия; **абсолю́тная мона́рхия** абсолют монархия; **конституцио́нная мона́рхия** конституциялы монархия

**МОНАСТЫ́РСКИЙ,** -ая, -ое **1.** монастырь ...ы; **монасты́рские зе́мли** монастырь ерҙәре **2.** *перен.* монастырҙағы кеүек, тыныс, аулаҡ; **монасты́рский о́браз жи́зни** монастырҙағы кеүек йәшәү

**МОНАСТЫ́РЬ** *м* монастырь

**МОНА́Х** *м* и **МОНА́ХИНЯ** *ж* **1.** монах; **постри́чься в мона́хи** монах булып китеү (*сәс ҡырҡтырыу йолаһын үтәп*) **2.** *разг.* суфый (*кешегә ҡатнашмай йәшәүсе, тыйнаҡ*)

**МОНА́ШЕНКА** *ж* **1.** *разг. см.* **мона́х 2.** *зоол.* сыбарғанат (*ҡара таплы күбәләк*)

**МОНА́ШЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** монах(тар) ...ы; **мона́шеская ке́лья** монах хөжрәһе (*ял итеү бүлмәһе*); **мона́шеское о́бщество** монахтар йәмғиәте **2.** суфыйҙарса; **мона́шеский о́браз жи́зни** суфыйҙарса йәшәү

**МОНА́ШЕСТВО** *с* **1.** монахлыҡ; **приня́ть мона́шество** монахлыҡ ҡабул итеү **2.** *собир.* монахтар

**МОНА́ШКА** *ж*; *разг. см.* **мона́х**

**МОНГОЛОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое монголға оҡшаш; **челове́к с монголови́дным лицо́м** монголға оҡшаш йөҙлө кеше

**МОНГО́ЛЫ** *мн.* монголдар, монгол халҡы // *ед.* **монго́л** *м* монгол ир-аты; **монго́лка** *ж* монгол ҡатын-ҡыҙы

**МОНГО́ЛЬСКИЙ,** -ая, -ое монгол(дар) ...ы, Монголия ...ы; **монго́льский язы́к** монгол теле

**МОНЕ́ТА** *ж* **1.** аҡса, тәңкә; **золота́я моне́та** алтын тәңкә; **неме́цкая сере́бряная моне́та** талир тәңкә; **рублёвая моне́та** бер тәңкәлек аҡса **2.** *собир.* (*металлические деньги*) тимер (ваҡ) аҡса; **чека́нить моне́ту** тимер аҡса һуғыу

**МОНЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡса ...ы; **моне́тный фонд** аҡса фонды **2.** аҡса һуғыу ...ы; **моне́тный стано́к** аҡса һуғыу станогы ♦ **моне́тный двор** аҡса һуғыу йорто

**МОНЕ́ТЧИК** *м* аҡса һуғыусы (*эшсе*)

**МОНИ́ЗМ** *м* монизм (*донъяның нигеҙе итеп бер башланғысты таныған фәлсәфәүи ағым*); **материали́стический мони́зм** материалистик монизм

**МОНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *филос.* монизм ...ы; **монисти́ческая филосо́фия** монизм фәлсәфәһе

**МОНИ́СТО** *с* муйынса

**МОНИТО́Р I** *м* монитор (**1.** *һуғыш карабы* **2.** *тау. һыу һиптергес*)

**МОНИТО́Р II** *м*; *тех.* монитор (**1.** *контроллэү, күҙәтеү, тикшереү приборы* **2.** *телевидение тапшырыуын контроллэү өсөн телестудиялағы телеэкран* **3.** *компьютер экраны*)

**МОНОГА́МИЯ** *ж*; *книжн.* моногамия, бер никахлылыҡ

**МОНОГА́МНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* моногамиялы, бер никахлы; **монога́мная семья́** бер никахлы ғаилә

**МОНОГРА́ММА** *ж* монограмма (*ике йәки бер нисә хәрефтән яҙыу, сигеү йәки һүрәтләү*)

**МОНОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое монографик; **монографи́ческое иссле́дование** монографик тикшеренеү

**МОНОГРА́ФИЯ** *ж* монография; **написа́ть моногра́фию** монография яҙыу

**МОНО́КЛЬ** *м* монокль (*күҙлек урынына бер генә күҙгә ҡуйыла торған оптик быяла*); **смотре́ть че́рез моно́кль** монокль аша ҡарау

**МОНОКУЛЬТУ́РА** *ж*; *с.-х.* монокультура (*бер урында оҙаҡ йылдар бер төр ашлыҡ сәсеү һәм үҫтереү*)

**МОНОЛИ́Т** *м* монолит (**1.** *бөтөн бер ҙур таш; шунан яһалған һәйкәл, колонна һ.б.* **2.** *геол. тупраҡ ҡатламының төҙөлөшөн вертикаль киҫелештә күрһәткән өлгө*)

**МОНОЛИ́ТНОСТЬ** *ж* монолитлыҡ, бер бөтөнлөк, берҙәмлек; **моноли́тность го́рной поро́ды** тау тоҡомоноң монолитлығы

**МОНОЛИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое монолит, бер бөтөн, берҙәм; **моноли́тная коло́нна** монолит колонна; **моноли́тный коллекти́в** берҙәм коллектив

**МОНОЛО́Г** *м* монолог (*пьесала ҡатнашыусының үҙенә йәки тамашасыларға ҡарата телмәре*); **лири́ческий моноло́г** лирик монолог; **чита́ть моноло́г** монолог уҡыу

**МОНОМА́НИЯ** *ж* мономания (*берәй идея, фекергә ныҡ бирелеү, ни менәндер артыҡ мауығыу*)

**МОНОМЕТАЛЛИ́ЗМ** *м*; *эк.* монометаллизм (*аҡса әйләнеше нигеҙенә металл — алтын йәки көмөш — аҡса һалынған система*)

**МОНОМЕТАЛЛИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое монометаллизм ...ы; **монометалли́ческая де́нежная систе́ма** монометаллизм аҡса системаһы

**МОНОПЛА́Н** *м* моноплан

**МОНОПОЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **монополизи́ровать**

**МОНОПОЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* монополиялаштырыу; **монополизи́ровать промы́шленность** сәнәғәтте монополиялаштырыу

**МОНОПОЛИЗИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* монополиялашыу; **предприя́тия монополизи́руются** предприятиелар монополиялаша **2.** *несов. страд. от* **монополизи́ровать**

**МОНОПОЛИ́СТ** *м* монополист (**1.** *берәй өлкәлә монополия менән файҙаланыусы* **2.** *эре капиталист, эре капитал вәкиле*)

**МОНОПОЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое монополистик; **монополисти́ческий капита́л** монополистик капитал; **монополисти́ческое объедине́ние** монополистик берләшмә

**МОНОПОЛИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое монополистик; **монополи́стские сою́зы капитали́стов** капиталистарҙың монополистик берекмәләре

**МОНОПО́ЛИЯ** *ж* монополия (**1.** *берәй нәмәне эшләп сығарыу йәки һатыу өлкәһендәге сикләнмәгән тулы хоҡуҡ* **2.** *берәй хужалыҡ өлкәһендә хакимлыҡ иткән һәм максималь табыш алыу өсөн капиталды концентрациялау нигеҙендә барлыҡҡа килгән эре капиталистик берләшмә*)

**МОНОПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое монополистик, монополь, монополиялы; **монопо́льное пра́во** монополистик хоҡуҡ; **монопо́льное по́льзование** монополиялы файҙаланыу

**МОНОРЕ́ЛЬС** *м* монорельс (*бер рельслы аҫылмалы юл*)

**МОНОТЕИ́ЗМ** *м*; *книжн.* монотеизм (*бер аллалы дин, бер генә аллаға ышаныу*)

**МОНОТЕИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* монотеизм ...ы; **монотеисти́ческое уче́ние** монотеизм тәғлимәте

**МОНОТИ́П** *м* монотип (*хәрефтәрҙе айырым-айырым ҡойоп йыйған типография машинаһы*)

**МОНОТИПИ́СТ** *м* монотипсы

**МОНОТИ́ПНЫЙ,** -ая, -ое монотип ...ы; **моноти́пная ле́нта** монотип таҫмаһы; **моноти́пный набо́р** монотип йыйыуы

**МОНОТО́ННОСТЬ** *ж* бер төрлөлөк; **моното́нность шу́ма** шау-шыуҙың бер төрлөлөгө; **моното́нность жи́зни** тормоштоң бер төрлөлөгө

**МОНОТО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*однотонный, однозвучный*) бер төрлө (тауышлы), бер тонлы, күңелһеҙ, үҙгәрешһеҙ; **моното́нный го́лос** бер тонлы тауыш **2.** *перен.* (*однообразный*) күңелһеҙ, үҙгәрешһеҙ, ялҡытҡыс, бер төрлө; **моното́нная жизнь** бер төрлө (ялҡытҡыс) тормош; **моното́нные дни** күңелһеҙ көндәр

**МОНОФТО́НГ** *м*; *лингв.* монофтонг (*ике өнгә тарҡалмай торған һуҙынҡы өн*)

**МОНПАНСЬЕ́** *с нескл.* лампасый (*кәнфит төрө*)

**МОНСТР** *м* монстр (*гәрип, килбәтһеҙ кеше йәки хайуан; күбеһенсә физик йәки мораль яҡтан етешһеҙлеге булған үтә һөйкөмһөҙ, килбәтһеҙ кешегә ҡарата*)

**МОНТА́Ж** *м* монтаж, монтажлау (*ҡороу, йыйып ҡороу*); **монта́ж прока́тных ста́нов** прокат стандары монтажлау; **монта́ж фи́льма** фильм монтажлау

**МОНТА́ЖНИК** *м* и **МОНТА́ЖНИЦА** *ж* монтажсы, монтажлаусы; **монта́жник станко́в** станоктар монтажлаусы

**МОНТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое монтажлау ...ы, монтаж ...ы; **монта́жная мастерска́я** монтажлау оҫтаханаһы; **монта́жные рабо́ты** монтаж эштәре; **монта́жный экра́н** монтажлау экраны

**МОНТЁР** *м* **1.** *см.* **монта́жник** **2.** электр үткәреү менән шөғөлләнгән белгес, электромонтёр

**МОНТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **монти́ровать**

**МОНТИ́РОВАТЬ** *несов. что* ҡороу, йыйыу, монтажлау; **монти́ровать кинофи́льм** кинофильм монтажлау; **монти́ровать стано́к** станок монтажлау

**МОНТИ́РОВАТЬСЯ** *несов. страд.* от **монти́ровать**

**МОНТИРО́ВКА** *ж см.* **монти́ровать**

**МОНТИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое йыйыу ...ы, монтажлау ...ы; **монтиро́вочные рабо́ты** монтажлау эштәре

**МОНТИРО́ВЩИК** *м* монтажсы, монтажлаусы

**МОНУМЕ́НТ** *м* монумент, һәйкәл

**МОНУМЕНТА́ЛЬНОСТЬ** *ж* монументаллек, ҙурлыҡ, мөһабәтлек; **монумента́льность сооруже́ния** ҡоролманың мөһабәтлеге (монументаллеге)

**МОНУМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бик ҙур, мөһабәт, монументаль; **монумента́льное зда́ние** бик ҙур йорт; **монумента́льная скульпту́ра** мөһабәт скульптура **2.** монументаль, бик ҙур, тәрән йөкмәткеле; **монумента́льное произведе́ние** монументаль әҫәр

**МОНУМЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое монумент ...ы, монумент яһау ...ы; **монуме́нтные рабо́ты** монумент эштәре; **монуме́нтная мастерска́я** монумент яһау оҫтаханаһы

**МОПЕ́Д** *м* мопед (*моторлы велосипед*)

**МОПС** *м* мопс (*бүлмә эте тоҡомо*)

**МОР** *м*; *уст*., *прост*. үләт

**МОРАЛИЗИ́РОВАТЬ** и **МОРАЛИЗОВА́ТЬ** *несов*. әхлаҡҡа өйрәтеү, өгөт-нәсихәт уҡыу (биреү), мораль уҡыу

**МОРАЛИ́СТ** *м* әхлаҡсы, өгөт-нәсихәт биреүсе

**МОРАЛИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое әхлаҡи, өгөт-нәсихәткә (әхлаҡҡа) бағышланған; **моралисти́ческая литерату́ра** өгөт-нәсихәткә бағышланған әҙәбиәт

**МОРА́ЛЬ** *ж* **1.** әхлаҡ; **общечелове́ческая мора́ль** бөтә кешелек өсөн уртаҡ әхлаҡ; **челове́к высо́кой мора́ли** юғары әхлаҡлы кеше **2.** ғибрәтле нәтижә, һабаҡ; **мора́ль ба́сни** мәҫәлдең һабағы **3.** *разг*. өгөт-нәсихәт; **чита́ть мора́ль** өгөт-нәсихәт биреү

**МОРА́ЛЬНО-ПОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое әхлаҡи-сәйәси; **мора́льно-полити́ческое еди́нство о́бщества** йәмғиәттең әхлаҡи-сәйәси берҙәмлеге

**МОРА́ЛЬНО-ЭТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое әхлаҡи-этик; **мора́льно-эти́ческие осно́вы о́бщества** йәмғиәттең әхлаҡи-этик нигеҙҙәре

**МОРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әхлаҡ ...ы; **мора́льный ко́декс** әхлаҡ кодексы **2.** әхлаҡлы, әҙәпле; **мора́льный посту́пок** әхлаҡлы (әҙәпле) ҡылыныш **3.** әхлаҡи; **мора́льное ка́чество** әхлаҡи сифат; **оказа́ть мора́льную подде́ржку** әхлаҡи ярҙам күрһәтеү ♦ **мора́льный изно́с маши́н (обору́дования и т.п.)** *эк*. машинаның (ҡорамалдың) ваҡыты сығыу (*яңы машинанан, ҡорамалдан һ.б. ҡалышыуы*)

**МОРАТО́РИЙ** *м* мораторий, мөһләт; **объяви́ть морато́рий** мөһләт иғлан итеү

**МОРГ** *м* мәйетхана, морг

**МОРГА́НИЕ** *с см*. **морга́ть**

**МОРГА́ТЬ** *несов*. **1.** күҙ ҡыҫҡылау, күҙ йомғолау; **ча́сто морга́ть** йыш-йыш күҙ йомғолау **2.** *кому* и *без доп*. (*подавать знак*) күҙ ҡыҫыу **3.** (*мерцать*) йымылдау, емелдәү; **морга́л кра́сный огонёк** ҡыҙыл ут емелдәй ине

**МОРГНУ́ТЬ** *сов. см*. **морга́ть** ♦ **гла́зом не моргну́ть** күҙ ҙә йоммау (*тартынып тормау*)

**МО́РДА** *ж* **1.** (*животного*) томшоҡ, морон; **соба́чья мо́рда** эт мороно **2.** *груб*., *прост*. (*лицо*) йөҙ, бит, йәмһеҙ йөҙ; **бить в мо́рду** биткә һуғыу

**МОРДА́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг*. (*о животном*) ҙур моронло, томшоҡло; **морда́стый щено́к** ҙур моронло көсөк **2.** *прост*. (*о человеке*) табаҡ битле

**МОРДВА́** *ж собир*. мордвалар, мордва халҡы

**МОРДВИ́НЫ** *мн*. мордвалар, мордва халҡы // *ед*. **мордви́н** *м* мордва ир-аты; **мордви́нка** *ж* мордва ҡатын-ҡыҙы

**МОРДО́ВСКИЙ,** -ая, -ое мордва ...ы, Мордовия ...ы; **мордо́вские языки́** мордва телдәре

**МОРДО́ВЦЫ** *мн*. мордвалар, мордва халҡы // *ед*. **мордо́вец** *м* мордва ир-аты; **мордо́вка** *ж* мордва ҡатын-ҡыҙы

**МО́РЕ** *с*; *прям*., *перен*. диңгеҙ; **Чёрное мо́ре** Ҡара диңгеҙ; **мо́ре не́фти** нефть диңгеҙе; **золоти́стое мо́ре пшени́цы** алтын бойҙай диңгеҙе ♦ **мо́ре по коле́но** *кому* диңгеҙ тубыҡтан

**МОРЕ́НА** *ж*; *геол*. морена (*боҙлоҡ менән бергә шыуышып төшкән тау тоҡомдары өйөмө*)

**МОРЕ́НИЕ** *с см*. **мори́ть** 1, 3, 4

**МОРЁНЫЙ,** -ая, -ое **1.** төнәтелгән, әселеге (өткөслөгө) йомшартылған; **морёный хрен** әселеге йомшартылған керән **2.** *спец*. һыуҙа (иретмәлә) сыныҡтырылған, бешеккән; **морёное де́рево** һыуҙа сыныҡтырылған ағас

**МОРЕПЛА́ВАНИЕ** *с* **1.** диңгеҙҙә йөҙөү, диңгеҙ сәйәхәте **2.** диңгеҙҙә йөҙөү оҫталығы

**МОРЕПЛА́ВАТЕЛЬ** *м* диңгеҙҙә йөҙөүсе, диңгеҙ сәйәхәтсеһе

**МОРЕПЛА́ВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое диңгеҙҙә йөҙөү ...ы; **морепла́вательные ка́чества су́дна** караптың диңгеҙҙә йөҙөү сифаттары

**МОРЕХО́Д** и **МОРЕХО́ДЕЦ** *м* диңгеҙ сәйәхәтсеһе, моряк

**МОРЕХО́ДНОСТЬ** *ж* диңгеҙҙә йөҙә алыу; **морехо́дность корабля́** караптың диңгеҙҙә йөҙә алыуы

**МОРЕХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое диңгеҙ ...ы, диңгеҙҙә йөҙөү ...ы; **морехо́дное учи́лище** диңгеҙ училищеһы; **морехо́дные ка́рты** диңгеҙҙә йөҙөү карталары; **морехо́дные ка́чества су́дна** караптың диңгеҙҙә йөҙөү сифаттары

**МОРЕХО́ДСТВО** *с см*. **морепла́вание**

**МОРЖ** *м* морж (**1.** *диңгеҙ хайуаны* **2.** *ҡышын асыҡ бассейндарҙа һыу инеүсе*)

**МОРЖО́ВЫЙ,** -ая, -ое морж ...ы; **моржо́вые клыки́** морж тештәре

**МО́РЗЕ: аппара́т Мо́рзе** Морзе аппараты (*телеграф аппараты*); **а́збука Мо́рзе** Морзе алфавиты

**МОРЗЯ́НКА** *ж*; *разг.* Морзе алфавиты, Морзе аппараты

**МОРИ́ЛКА** *ж*; *спец.* морилка (**1.** *махс. ағас буяғанда ҡулланылған зәһәр шыйыҡлыҡ* **2.** *зарарлы бөжәктәргә ҡаршы көрәшеү өсөн ағыу*)

**МОРИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*уничтожать*) ҡырыу, үлтереү, үлтереп бөтөрөү, ағыулау; **мори́ть тарака́нов** тараҡандарҙы ҡырыу **2.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*изнурять*) интектереү, хәлдән тайҙырыу, яфа сиктереү; **мори́ть го́лодом** астан интектереү **3.** *что*; *разг.* әселегән (өткөслөгән) йомшартыу; **мори́ть хрен** керәндең әселеген йомшартыу **4.** *что*; *спец.* һыуҙа сыныҡтырыу, бешектереү; **мори́ть дуб** имәнде һыуҙа (иретмәлә) сыныҡтырыу **5.** *что*; *спец.*, *разг.* (*окрашивать морилкой*) морилка менән буяу; **мори́ть и лакирова́ть фане́ру** фанерҙы морилка һәм лак менән буяу

**МОРИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* интегеү, йөҙәү; **це́лый день мори́ться с кля́чей** арыҡ ат менән көнө буйы интегеү **2.** *страд. от* **мори́ть**

**МОРКО́ВКА** *ж*; *разг.* кишер; **дать де́тям по морко́вке** балаларға берәр кишер биреү

**МОРКО́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кишер ...ы; **морко́вные семена́** кишер орлоғо; **морко́вный пиро́г** кишер бәлеше **2.** (*о цвете*) кишер төҫөндәге, ҡыҙғылт һары

**МОРКО́ВЬ** *ж* кишер; **морко́вь кормова́я** мал кишере; **морко́вь столо́вая** аш кишере

**МОРМЫ́ШКА** *ж* мормышка (*ялтырауыҡ төрө*); **уди́лище с мормы́шкой** мормышкалы (ялтырауыҡлы) ҡармаҡ сыбығы

**МОРОВО́Й: морово́е пове́трие**; **морова́я я́зва** *уст.* үләт сире

**МОРО́ЖЕНИЦА** *ж* туңдырма яһау приборы (машинаһы)

**МОРО́ЖЕНОЕ** *с* туңдырма; **сли́вочное моро́женое** ҡаймаҡлы туңдырма; **шокола́дное моро́женое** шоколадлы туңдырма

**МОРО́ЖЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*подвергшийся замораживанию*) туңдырылған, туң; **моро́женая ры́ба** туңдырылған балыҡ **2.** (*попорченный морозом*) туңған, өшөгән; **моро́женый карто́фель** өшөгән картуф

**МОРО́З** *м* **1.** һалҡын, һыуыҡ; **кре́пкий моро́з** ҡаты һыуыҡ; **пять гра́дусов моро́за** биш градус һалҡын; **вы́нести мя́со на моро́з** итте һыуыҡҡа сығарыу **2.** *обычно мн.* **моро́зы** һалҡындар, һыуыҡтар; **треску́чие моро́зы** сатлама һыуыҡтар; **уда́рили моро́зы** һалҡындар башланды ♦ **моро́з по ко́же (по спине́) подира́ет (дерёт, пробега́ет и т.п.)** тән сымырлап китә

**МОРОЗИ́ЛКА** *ж* һыуытҡыс камера

**МОРОЗИ́ЛЬНИК** *м* һыуытҡыс, һыуытҡыс камера

**МОРОЗИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һыуытыу ...ы; **морози́льная ка́мера** һыуытыу камераһы

**МОРО́ЗИТЬ** *несов.* **1.** *что* туңдырыу (*һаҡлау маҡсаты менән*); **моро́зить сли́вы** слива туңдырыу **2.** *кого*; *разг.* өшөтөү, туңдырыу **3.** *кого* туңдырыу, ҡатырыу, ҡатырып үлтереү; **моро́зить тарака́нов** тараҡандарҙы ҡатырыу (ҡатырып үлтереү) **4.** *безл.* һыуытыу, һалҡынайтыу; **сего́дня на́чало моро́зить** бөгөн һалҡынайта башланы

**МОРО́ЗИТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** өшөү, туңыу, ҡатыу; **три часа́ подря́д моро́зиться на у́лице** өс сәғәт рәттән тышта туңып (өшөп) тороу **2.** *страд. от* **моро́зить** 1, 2, 3

**МОРО́ЗНО 1.** *нареч. см.* **моро́зный 2.** *в знач. сказ.*, *безл.* һалҡын, һыуыҡ; **сего́дня моро́зно** бөгөн һалҡын

**МОРО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое һалҡын, һыуыҡ; **моро́зный во́здух** һалҡын һауа; **моро́зный день** һыуыҡ көн

**МОРОЗОСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*о растениях*) ҡышлыҡлы, һалҡынға (һыуыҡҡа) сыҙам(лы), һыуыҡҡа бирешмәгән; **морозосто́йкая ози́мая пшени́ца** ҡышлыҡлы ужым бойҙайы **2.** һыуыҡҡа боҙолмаған (бирешмәгән, сыҙамлы); **морозосто́йкий бето́н** һыуыҡҡа сыҙамлы бетон

**МОРОЗОСТО́ЙКОСТЬ** *ж* һалҡынға (һыуыҡҡа) сыҙамлыҡ (бирешмәүсәнлек), ҡышлыҡлы булыу; **морозосто́йкость расте́ния** үҫемлектең һалҡынға сыҙамлығы

**МОРОЗОУСТО́ЙЧИВОСТЬ** *ж см.* **морозоусто́йчивый**

**МОРОЗОУСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое *см.* **морозосто́йкий** 1

**МОРОСИ́ТЬ** *несов.* бысҡаҡлау, бысҡаҡлап яуыу (тороу); **дождь мороси́т** ямғыр бысҡаҡлап яуа

**МОРО́ЧИТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* ҡаңғыртыу, аптыратыу; **моро́чить люде́й зна́харством** бағымсылыҡ менән кешеләрҙе ҡаңғыртыу ♦ **моро́чить го́лову** *кому* башын әйләндереү (бутау), баштарын ҡатырыу

**МОРО́ШКА** *ж* һаҙ еләге (*мүк еләге төрө*)

**МОРС** *м* морс (*эсемлек*); **я́блочный морс** алма морсы

**МОРСКО́Й,** -ая, -ое *в разн. знач.* диңгеҙ ...ы; **морско́й бе́рег** диңгеҙ яры; **морско́й бой** диңгеҙ һуғышы; **морски́е расте́ния** диңгеҙ үҫемлектәре; **морско́й флот** диңгеҙ флоты; **морска́я капу́ста** диңгеҙ кәбеҫтәһе; **морско́й лев** диңгеҙ арыҫланы; **морско́й кот** диңгеҙ бесәйе; **морска́я сви́нка** диңгеҙ сусҡаһы; **морско́й ёж** диңгеҙ терпеһе ♦ **морска́я боле́знь** диңгеҙ сире (*сайҡалыуҙан*); **морско́й волк** (*об опытном моряке*) диңгеҙ бүреһе

**МОРТИ́РА** *ж* мортира (*ҡыҫҡа көбәкле артиллерия орудиеһы*); **берегова́я морти́ра** яр буйы мортираһы

**МОРФЕ́МА** *ж*; *лингв.* морфема

**МО́РФИЙ** *м* морфий (*наркотик матдә*)

**МОРФИНИ́ЗМ** *м* морфинизм (*морфийға бирелец, наркомания төрө*)

**МОРФИНИ́СТ** *м* морфинист (*морфинизм менән яфаланыусы, сирләүсе*)

**МОРФОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое морфологик; **морфологи́ческий соста́в сло́ва** һүҙҙең морфологик составы

**МОРФОЛО́ГИЯ** *ж* морфология (**1.** *биол. тере организмды, уларҙың ағзаларын һәм тупраҡ төҙөлөшөн өйрәнеүсе фән* **2.** *организм, ағза һәм тупраҡ төҙөлөшө* **3.** *грам. тел ғилемендә грамматик мәғәнә бирәмеге буларак һүҙ төркөмдәрен, һүҙҙәрҙең үҙгәреү ҡағиҙәләрен һәм структураһын өйрәнеүсе бүлек*); **морфоло́гия бакте́рий** бактерияларҙың морфологияһы; **эксперимента́льная морфоло́гия** эксперименталь морфология; **морфоло́гия башки́рского языка́** башҡорт теле морфологияһы

**МОРЩИ́НА** *ж*; *прям., перен.* йыйырсыҡ, һыр, сырыш; **глубо́кие морщи́ны** тәрән йыйырсыҡтар; **морщи́ны на лбу** маңлай һырҙары; **морщи́ны под глаза́ми** күҙ төбөндәге йыйырсыҡтар; **морщи́ны на ска́терти** ашъяулыҡтағы сырыштар

**МОРЩИ́НИСТЫЙ,** -ая, -ое йыйырсыҡлы, сырышлы; **морщи́нистое лицо́** йыйырсыҡлы бит; **морщи́нистые ли́стья расте́ния** үҫемлектең сырышлы япраҡтары

**МОРЩИ́НИТЬ** *несов.*; *разг. см.* **мо́рщить** 1

**МОРЩИ́НИТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **мо́рщиться** 1, 3

**МОРЩИ́НКА** *ж* (ваҡ) йыйырсыҡ; **морщи́нки о́коло глаз** күҙ тирәһендәге йыйырсыҡтар

**МО́РЩИТЬ** *несов. что* **1.** йыйырыу, йыйырсыҡлау, йыйырсыҡландырыу, сирыу, сирылтыу; **мо́рщить лоб** маңлай йыйырыу; **мо́рщить лицо́** йөҙ сирылтыу, сырай һытыу; **мо́рщить нос** танау сирыу **2.** *перен.* шаҙралата; **ве́тер мо́рщит во́ду** ел һыу өҫтөн шаҙралата

**МОРЩИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* (*об одежде*) йыйырылыу, сирышыу, сырышыу, йыйырылып (сирышып) тороу; **пла́тье морщи́т** күлдәк йыйырылып тора; **на спине́ морщи́т** *безл.* кейемдең арҡаһы йыйырылып тора

**МО́РЩИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*о коже лица*) йыйырылыу, йыйырсыҡланыу, һырланыу; **лоб его́ мо́рщится** маңлайы йыйырыла **2.** сирылыу, сытрайыу; **мо́рщиться от бо́ли** ауыртыуҙан сытрайыу **3.** *перен.* (*о воде*) шаҙраланыу; **вода́ мо́рщится на пове́рхности** һыу өҫтө шаҙралана

**МОРЩИ́ТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **морщи́ть**

**МОРЯ́К** *м* моряк, диңгеҙсе; **моря́к торго́вого фло́та** сауҙа флоты моряғы

**МОРЯ́ЧКА** *ж* **1.** *см.* **моря́к 2.** моряк ҡатыны

**МОРЯЧО́К** *м*; *ласк. от* **моря́к**

**МОСКАТЕ́ЛЬ** *ж собир.* москатель (*химия сәнәғәте етештергән әйберҙәрҙе һатыу*)

**МОСКАТЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое москатель ...ы; **москате́льные това́ры** москатель тауарҙары; **москате́льный кио́ск** москатель киоскыһы

**МОСКИ́Т** *м* москит (*коньяк серәкәйе*)

**МОСКИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое москит ...ы; **моски́тный уку́с** москит тешләүе; **моски́тная се́тка** москит селтәре (*һаҡланыу өсөн*)

**МОСТ** *м* **1.** күпер; **железнодоро́жный мост** тимер юл күпере; **понто́нный мост** понтон күпер; **разводно́й мост** айырып, күтәреп ҡуймалы күпер **2.** *тех.* (*у автомобиля*) мост; **пере́дний мост** алғы мост **3.** *спорт.* мост; **сде́лать мост** мост яһау (төшөү) **4.** *спец.* (*зубной протез*) мост

**МО́СТИК** *м* **1.** *уменьш. от* **мост** 1, 3, 4; **2.** (*площадка на возвышении*) күперсек; **капита́нский мо́стик** капитан күперсеге

**МОСТИ́ТЬ** *несов. что* түшәү, йәйеү; **мости́ть у́лицу булы́жником** урамға суйырташ түшәү; **мости́ть пол** иҙән түшәү

**МОСТКИ́** *только мн.* баҫма; **пе́ред дома́ми проло́жены деревя́нные мостки́** өйҙәр алдында ағас баҫма һалынған

**МОСТОВА́Я** *ж* мостовой, түшәлгән урам (*урамдың түшәлгән өлөшө*); **булы́жная мостова́я** суйырташлы урам; **асфа́льтовая мостова́я** асфальт урам

**МОСТОВИ́К** *м* күпер һалыусы (төҙөүсе)

**МОСТОВИ́НА** *ж* күпер таҡтаһы (бүрәнәһе); **деревя́нный мост с кача́ющимися мостови́нами** бүрәнәләре һелкенеп торған ағас күпер

**МОСТОВО́Й,** -ая, -ое күпер ...ы; **мостово́й пролёт** күпер торогоо; **мостовы́е ба́лки** күпер бағаналары

**МОСТОВЩИ́К** *м* юл һалыусы (төҙөүсе, түшәүсе) эшсе

**МОСТОСТРОЕ́НИЕ** *с* күперҙәр һалыу (төҙөү)

**МОСЬЁ** и **МСЬЁ** *м нескл.* әфәнде, мосьё (*Францияла, революцияға тиклем Рәсәйҙә һ.б. ҡайһы бер илдәрҙә ирҙәрҙең исем-фамилияһына ҡушып әйтелгән һүҙ йәки ирҙәргә өндәшеү һүҙе*)

**МО́СЬКА** *ж*; *разг.* мопс, сәүек эт

**МОТ** *м* и **МОТО́ВКА** *ж*; *разг.* аҡса (мал) туҙҙырыусы

**МОТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* урау ...ы, сырмау ...ы; **мота́льная маши́на** (еп, сым) урау машинаһы

**МОТА́ТЬ I** *несов.* **1.** *что* урау, сырмау; **мота́ть ни́тки** еп сырмау **2.** *чем*; *разг.* сайҡау, ҡағыу, һелкеү, болғау; **мота́ть хвосто́м** ҡойроҡ болғау; **мота́ть голово́й** баш сайҡау ♦ **мота́ть (себе́) на ус** хәтерҙә тотоу, ҡолаҡҡа киртеп ҡуйыу

**МОТА́ТЬ II** *несов. что* и *без доп.*; *разг.* (*нерасчётливо тратить*) туҙҙырыу, түгеү, әрәмшәрәм итеү; **мота́ть де́ньги** аҡса туҙҙырыу

**МОТА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* сайҡалыу, һелкенеү, бәүелеү; **мота́лись верши́ны дере́вьев** ағас

баштары сайҡала ине **2.** *прост.* һәптәнләп (ҡыҙырып) йөрөү; **це́лый день мота́ться по го́роду** көнө буйы ҡалала һәптәнләп йөрөү **3.** *страд. от* **мота́ть** I 1

**МОТЕ́ЛЬ** *м* мотель (*автотуристар ҡунаҡханаһы*)

**МОТИ́В I** *м* **1.** сәбәп, һылтау; **без вся́кого моти́ва** һис бер сәбәпһеҙ **2.** дәлил; **привести́ моти́вы в по́льзу своего́ предложе́ния** үҙ тәҡдиме файҙаһына дәлилдәр килтереү

**МОТИ́В II** *м* **1.** нигеҙ, төп фекер; **основно́й моти́в по́вести** повестың төп фекере **2.** *муз.* көй, моң; **моти́в пе́сни** йырҙың көйө

**МОТИВИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* дәлил килтереү, дәлилләү, нигеҙләү; **мотиви́ровать отка́з** баш тартыуҙы нигеҙләү

**МОТИВИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **мотиви́ровать** **2.** дәлилдәр; **доказа́тельная мотивиро́вка** ышандырырлыҡ дәлилдәр

**МОТИВИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое дәлилләү ...ы; **мотивиро́вочная часть резолю́ции** резолюцияның дәлилләү өлөшө

**МОТНУ́ТЬ** *сов. см.* **мота́ть** I 2; **мотну́ть голово́й** баш сайҡап ҡуйыу

**МОТНЯ́** *ж* (*часть невода*) битәл, йәтмә, йылым тоғо

**МОТО...** *ҡушма һүҙҙәрҙең түбәндәге мәғәнәләрҙе белдергән беренсе өлөшө*: 1) "*моторлы*", *мәҫ.*, **мотодрези́на** моторлы дрезина; **мотопила́** моторлы бысҡы; 2) "*моторлаштырылған*", *мәҫ.*, **мотоколо́нна** моторлаштырылған колонна; 3) "*мотоцикл ...ы*", *мәҫ.*, **мотоспо́рт** мотоцикл спорты

**МОТОБО́Л** *м*; *спорт.* мотобол (*мотоциклдарҙа футбол уйнау*)

**МОТОВИ́ЛО** *с*; *спец.* **1.** тырпыса (*еп, сым һ.б. сырмау машинаһы, йәйланмаһы*); **мота́ть пря́жу на мотови́ло** епте тырпысаға сырмау **2.** мотовило (*урғыс машиналарҙа*)

**МОТОВСТВО́** *с* аҡса туҙҙырыу (әрәм-шәрәм итеү)

**МОТОГО́НКИ** *мн.*; *спорт.* мотоцикл ярыштары, мотоуҙыш

**МОТОДРО́М** *м* мотодром (*мотоциклдарҙы һынау һәм ярыш уҙғарыу майҙаны*)

**МОТО́К** *м* йомғаҡ, баҫма; **мото́к ше́рсти** (бер) йомғаҡ йөн

**МОТОКРО́СС** *м см.* **мотопробе́г**

**МОТОМЕХАНИЗИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое (*о войсках*) мотомеханикалаштырылған, мотомеханизацияланған; **мотомеханизи́рованная а́рмия** мотомеханизацияланған армия

**МОТОПЕХО́ТА** *ж* мотопехота (*моторлаштырылған пехота*)

**МОТОПРОБЕ́Г** *м*; *спорт.* мотоярыш, мотоуҙыш

**МОТО́Р** *м* мотор; **мото́р самолёта** самолёт моторы

**МОТОРИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **моторизова́ть**

**МОТОРИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **моторизова́ть** **2.** *прил.* моторлаштырылған; **моторизо́ванный полк** моторлаштырылған полк

**МОТОРИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что* моторлаштырыу (*автотранспорт ҡулланыуҙы киң йәйелдереү*); **моторизова́ть полк** полкты моторлаштырыу

**МОТОРИ́СТ** *м* и **МОТОРИ́СТКА** *ж* моторсы, моторист; **рабо́чий-мотори́ст** эшсе-моторсы

**МОТО́РКА** *ж*; *разг.* моторлы кәмә

**МОТО́РНЫЙ I,** -ая, -ое **1.** мотор ...ы; **мото́рный цех** мотор цехы **2.** моторлы; **мото́рный ваго́н** моторлы вагон

**МОТО́РНЫЙ II,** -ая, -ое *псих., физиол.* хәрәкәт ...ы; **мото́рные це́нтры головно́го мо́зга** баш мейеһенең хәрәкәт үҙәктәре; **мото́рные рефле́ксы** хәрәкәт рефлекстары

**МОТОРО́ЛЛЕР** *м* мотороллер

**МОТОСА́НИ** *только мн.* мотосана

**МОТОЦИ́КЛ** и *уст.* **МОТОЦИКЛЕ́Т** *м* мотоцикл, мотоциклет; **мотоци́кл с коля́ской** коляскалы мотоцикл

**МОТЫ́ГА** *ж* кәтмән, тәпке; **деревя́нная моты́га** ағас кәтмән; **многоря́дная моты́га** күп рәтле кәтмән; **обрабо́тать огоро́д моты́гой** йәшелсә баҡсаһын тәпке менән эшкәртеү

**МОТЫ́ЖИТЬ** *несов. что* кәтмәнләү, тәпкеләү; **моты́жить зе́млю** ерҙе тәпкеләү

**МОТЫЛЁК** *м* күбәләк

**МОТЫ́ЛЬ** *м* оҙонморон ҡарышлауығы

**МОТЫЛЬКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** күбәләк ...ы; **мотылько́вые кры́лышки** ваҡ күбәләк ҡанаты **2.** *в знач. сущ.* **мотылько́вые** *мн.*; *бот.* күбәләк сәскәләр

**МОХ** *м* мүк; **торфяно́й мох** торф мүге ♦ **мо́хом обрасти́ (зарасти́, покры́ться и т.п.)** (*о человеке*) мүк менән ҡапланыу (ҡырағайланыу, кешелек ҡиәфәтен юғалтыу)

**МОХЕ́Р** *м* мохер (*ангор кәзәһе йөнө*)

**МОХЕ́РОВЫЙ,** -ая, -ое мохер, мохерҙан бәйләнгән; **мохе́ровый шарф** мохер шарф

**МОХНА́ТЫЙ,** -ая, -ое йөнтәҫ; **мохна́тая соба́ка** йөнтәҫ эт; **мохна́тые бро́ви** йөнтәҫ ҡаш; **мохна́тая гу́сеница** йөнтәҫ ҡарышлауыҡ; **мохна́тая ша́пка** йөнтәҫ бүрек; **мохна́тый хала́т** йөнтәҫ халат

**МОХНОНО́ГИЙ,** -ая, -ое йөнтәҫ аяҡлы; **мохноно́гие ло́шади** йөнтәҫ аяҡлы аттар

**МОХОВИ́К** *м* моховик (*көрән төҫлө, бәрхәттәй йомшаҡ ҡалпаҡлы бәшмәк*)

**МОХОВО́Й,** -ая, -ое **1.** мүк ...ы; **мохово́й покро́в** мүк ҡатлауы **2.** мүкле; **мохово́е боло́то** мүкле һаҙлыҡ

**МОЦИО́Н** *м* саф һауала йөрөү

**МОЧА́** *ж* һейҙек, бәүел

**МОЧА́ЛИТЬ** *несов. что*; *спец.* йыуғысҡа әйләндереү; **моча́лить лы́ко** йүкәне йыуғысҡа әйләндереү

**МОЧА́ЛКА** *ж* йыуғыс; **тере́ть спи́ну моча́лкой** арҡаны йыуғыс менән ышҡыу

**МОЧА́ЛО** *с* һалабаш

**МОЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һалабаш ...ы; **моча́льное произво́дство** һалабаш етештереү **2.** һалабаш; **моча́льный матра́ц** һалабаш матрац

**МОЧЕВИ́НА** *ж*; *хим.* мочевина

**МОЧЕВО́Й,** -ая, -ое һейҙек ...ы; **мочево́й пузы́рь** һейҙек ҡыуыгы

**МОЧЕВЫДЕЛЕ́НИЕ** *с* һейеү, бәүел бүлеп сығарыу

**МОЧЕГО́ННЫЙ,** -ая, -ое һейҙерткес; **мочего́нные сре́дства** һейҙерткес дарыуҙар

**МОЧЕИСПУСКА́НИЕ** *с см.* **мочевыделе́ние**

**МОЧЕИСПУСКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һейҙек (бәүел) ...ы; **мочеиспуска́тельный кана́л** бәүел юлы

**МОЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **мочи́ть** 2, 3; **моче́ние кож** күн ебетеү **2.** *разг.* (*мочёные продукты*) ебетелгән аҙыҡ

**МО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **мочи́ть**

**МОЧЁНЫЙ,** -ая, -ое ебетелгән, ебетеп әҙерләнгән; **мочёные я́блоки** ебетелгән алмалар

**МОЧЕОТДЕЛЕ́НИЕ** *с* бәүел бүленеп сығыу

**МОЧЕТО́ЧНИК** *м*; *анат.* бәүел юлы

**МОЧИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ебетеү ...ы, сылатыу ...ы; **мочи́льный чан** ебетеү тәпәне

**МОЧИ́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* еүешләү, сылатыу; **мочи́ть оде́жду** кейемде сылатыу **2.** *что* ебетеү, һыуға батырыу; **мочи́ть бельё** кер ебетеү **3.** *что* ебетеү; **мочи́ть клю́кву** мүк еләген ебетеү

**МОЧИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һейеү, бәүел бүлеп сығарыу **2.** *страд. от* **мочи́ть**

**МО́ЧКА I** *ж* **1.** (*часть уха*) йәберсәк, йәрпесәк, ҡолаҡ йомшағы; **вдеть се́рьги в мо́чки уше́й** ҡолаҡ йәрпесәктәренә алҡалар тағыу **2.** *бот.* тармаҡ, суҡ (*тамырҙа*) **3.** (*пучок льна*) тәрәш, услам

**МО́ЧКА II** *ж см.* **мочи́ть** 2, 3

**МОЧКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое *бот.* суҡлы, тармаҡлы; **мочкова́тый ко́рень** суҡлы тамыр

**МОЧЬ I** *несов. обычно с неопр.* **1.** -а(-ай) алыу; **он мо́жет поня́ть вас** ул һеҙҙе аңлай ала; **я не могу́ сказа́ть об э́том всем** мин был турала бөтә кешегә лә әйтә алмайым **2.** мөмкин булыу; **сего́дня но́чью он мо́жет прие́хать** бөгөн төндә уның ҡайтыуы мөмкин ♦ **мо́жет быть**; **быть мо́жет** *в знач. вводн. сл.* ихтимал, бәлки; **не мо́жет быть** булмаҫ, булыуы мөмкин түгел

**МОЧЬ II** *ж*; *прост.* (*сила*) көс, хәл; **бежа́ть изо всей мо́чи** бөтә көскә йүгереү ♦ **мо́чи нет (не ста́ло)** түҙер хәл юҡ (ҡалманы)

**МОШЕ́ННИК** *м* алдаҡсы, мут ир-ат; **моше́нница** *ж* алдаҡсы, мут ҡатын-ҡыҙ

**МОШЕ́ННИЧАТЬ** *несов.* алдау, алдашыу, мутлашыу

**МОШЕ́ННИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое алдаҡсы ...ы, мутлыҡ ...ы; **моше́ннические проде́лки** мутлыҡ эштәре

**МОШЕ́ННИЧЕСТВО** *с* алдыҡ, мутлыҡ; **соверши́ть моше́нничество** мутлыҡ эшләү

**МО́ШКА** *ж* ләпәкәй (һуҡыр) себен

**МОШКАРА́** *ж собир.* себен-серәкәй

**МОШНА́** *ж*; *разг.* (*богатство, деньги*) байлыҡ, аҡса ♦ **туга́я (то́лстая) мошна́** *у кого* аҡсаға бай кеше, мал-мөлкәтле кеше; **наби́ть мошну́** байлыҡ йыйыу, кеҫә ҡалынайтыу; **тряхну́ть мошно́й** аҡса ҡыҙғанмау, аҡса түгеү (туҙҙырыу)

**МОШО́НКА** *ж*; *анат.* ҡаҫа

**МОЩЕ́НИЕ** *с см.* **мости́ть**

**МОЩЁНЫЙ,** -ая, -ое йәйелгән, түшәлгән (*таш, ағас һ.б.*); **мощёная у́лица** таш түшәлгән урам

**МО́ЩИ** *только мн.* изге мәйет ♦ **живы́е (ходя́чие) мо́щи** ҡаҡ һөйәк, тере мәйет (*ябыҡ кешегә ҡарата*)

**МО́ЩНОСТЬ** *ж* **1.** (*сила*) көс, ҡеүәт, ҡеүәтлек, көслөлөк; **мо́щность го́лоса** тауыштың көслөлөгө **2.** *горн.* (*толщина пласта*) ҡалынлыҡ; **мо́щность у́гольного пласта́** күмер ҡатламының ҡалынлығы **3.** *физ.*, *тех.* ҡеүәт; **мо́щность дви́гателя** двигателдең ҡеүәте **4.** *мн.* **мо́щности** етештереү объекттары (*завод-фабрикалар*), ҡеүәттәр; **произво́дственные мо́щности** етештереү ҡеүәттәре

**МО́ЩНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*сильный*) көслө, ҡеүәтле; **мо́щный уда́р** көслө удар; **мо́щный мото́р** ҡеүәтле мотор; **мо́щный конь** көслө ат **2.** киң, ҡалын, көслө, ҙур, мөһабәт; **мо́щные пле́чи** киң яурындар; **мо́щная ше́я** ҡалын елкә (муйын); **мо́щные ру́ки** көслө ҡулдар; **мо́щный дуб** мөһабәт имән **3.** *горн.* (*плотный, массивный*) ҡалын; **мо́щные пласты́ ка́менной со́ли** таш тоҙоноң ҡалын ҡатламдары

**МОЩЬ** *ж* көс, ҡеүәт; **физи́ческая мощь** физик көс; **боева́я мощь** хәрби көс; **мощь мото́ра** моторҙың ҡеүәте

**МО́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **мыть** **2.** *прил.* йыуа торған, йыуыуға ҡулланылған; **мо́ющие сре́дства** йыуыуға ҡулланылған әйберҙәр

**МОЯ́** *ж мест. см.* **мой**

**МРАК** *м*; *прям.*, *перен.* ҡараңғылыҡ; **ночно́й мрак** төн ҡараңғылығы; **мрак на душе́** күңелдә ҡараңғылыҡ ♦ **покры́то мра́ком неизве́стности** билдәһеҙлек пәрҙәһе менән ҡапланған

**МРАКОБЕ́С** *м* аң-белем (яңылыҡ) дошманы

**МРАКОБЕ́СИЕ** *с* аң-белемгә (яңылыҡҡа) дошманлыҡ

**МРА́МОР** *м* мәрмәр; **па́мятник из мра́мора** мәрмәрҙән яһалған һәйкәл

**МРА́МОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәрмәр, мәрмәрҙән яһалған; **мра́морная плита́** мәрмәр плита **2.** мәрмәргә оҡшаш; **мра́морные узо́ры** мәрмәргә оҡшаш биҙәктәр **3.** *перен.* мәрмәрҙәй аҡ; **мра́морные ру́ки** мәрмәрҙәй аҡ ҡулдар

**МРАЧНЕ́ТЬ** *несов.* ҡараңғыланыу; **мрачне́ет не́бо** күк йөҙө ҡараңғылана бара; **мрачне́ет его́ лицо́** уның йөҙө ҡараңғылана бара

**МРА́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** ҡараңғылыҡ; **мра́чность па́смурного дня** болотло көндөң ҡараңғылығы **2.** күңелһеҙлек, яманһыулыҡ; **мра́чность мы́слей** уйҙарҙың күңелһеҙлеге

**МРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡараңғы; **мра́чная ночь** ҡараңғы төн; **мра́чное лицо́** ҡараңғы сырай **2.** *перен.* ауыр, шомло, ҡара; **мра́чные времена́** ауыр ваҡыттар

**МСТИ́ТЕЛЬ** *м* үс алыусы (ҡайтарыусы) ♦ **наро́дные мсти́тели** *высок.* халыҡ үс алыусылары, партизандар

**МСТИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* үс алыусанлыҡ, кенә ҡыуыусанлыҡ

**МСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үс алыусан (ҡайтарыусан), кенә ҡыуыусан, кенәсел; **мсти́тельный челове́к** кенәсел кеше

**МСТИТЬ** *несов. кому-чему* үсләшеү, үс алыу (ҡайтарыу); **мстить врагу́** дошмандан үс алыу; **мстить за оскорбле́ние** мыҫҡыл иткән өсөн үс ҡайтарыу

**МУА́Р** *м* муар (*ялтырауыҡлы туҡыма*)

**МУА́РОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** муар ...ы; **муа́ровое пла́тье** муар күлдәк **2.** муар төҫлө, ялтырауыҡлы; **муа́ровая пове́рхность мо́ря** диңгеҙҙең өҫтө муар төҫлө

**МУДРЕНО́** и **МУДРЁНО** **1.** *нареч.* аңлайышһыҙ; **говори́ть мудрёно** аңлайышһыҙ һөйләү **2.** *в знач. сказ., безл.* **мудрено́** ғәжәп; **не мудрено́** ғәжәп түгел; **не мудрено́, что она́ скуча́ет по друзья́м** уның дуҫтарын һағыныуы ғәжәп түгел

**МУДРЁНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** аңлауы ауыр, ауыр аңлайышлы; **мудрёный стиль** ауыр аңлайышлы стиль; **мудрёные имена́** ауыр аңлайышлы исемдәр **2.** ҡыйын, ҡатмарлы; **мудрёная зада́ча** ҡатмарлы мәсьәлә **3.** сәйер, хикмәтле; **мудрёный стари́к** сәйер ҡарт

**МУДРЕ́Ц** *м* фекер эйәһе, ҙур ғилем эйәһе, бик аҡыллы кеше

**МУДРИ́ТЬ** *несов.*; *разг.* аҡыл һатыу, хикмәт сығарыу, хикмәтләндереү, әллә ниҙәр ҡыландырыу; **мудри́ть с реше́нием зада́чи** мәсьәләне әллә ниҙәр ҡыландырып сисеү

**МУ́ДРОСТЬ** *ж* **1.** тәрән (ҙур) аҡыллылыҡ, тәрән мәғәнәлелек; **му́дрость учёного** ғалимдың тәрән аҡыллылығы; **му́дрость посло́вицы** мәҡәлдең тәрән мәғәнәлелеге **2.** *разг.* ҡатмарлылыҡ; **в э́том де́ле осо́бой му́дрости нет** был эштә әллә ниндәй ҡатмарлылыҡ юҡ ♦ **зуб му́дрости** аҡыл теше

**МУ́ДРСТВОВАНИЕ** *с*; *разг. см.* **му́дрствовать**

**МУ́ДРСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг. см.* **мудри́ть**

**МУ́ДРЫЙ,** -ая, -ое тәрән аҡыллы, төплө, дөрөҫ; **му́дрый челове́к** тәрән аҡыллы кеше; **му́драя поли́тика** (тәрән) аҡыллы сәйәсәт; **му́дрые слова́** (тәрән) аҡыллы һүҙҙәр; **му́дрое реше́ние** дөрөҫ ҡарар

**МУЖ** *м* **1.** (*мн.* **мужья́**) ир; **муж мое́й подру́ги** әхирәтемдең ире **2.** (*мн.* **мужи́**) *уст., высок.* ир (кеше); **почте́нные мужи́** оло ир кешеләр **3.** (*мн.* **мужи́**) эшмәкәр; **учёный муж** фән эшмәкәре

**МУЖА́НИЕ** *с см.* **мужа́ть**

**МУЖА́ТЬ** *несов.* **1.** (үҫеп) етеү, буйға етеү; **па́рень растёт, мужа́ет** егет үҫә, буйға етә **2.** *перен., высок.* көсәйә (нығый) барыу; **мужа́ет молода́я страна́** йәш ил нығына

**МУЖА́ТЬСЯ** *несов.* нығыныу, көсәйеү

**МУЖЕЛО́ЖСТВО** *с*; *книжн. см.* **педера́стия**

**МУЖЕНЕНАВИ́СТНИЦА** *ж* ирҙәрҙе күрә алмаусы ҡатын-ҡыҙ

**МУЖЕПОДО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ирҙәүкә; **мужеподо́бная же́нщина** ирҙәүкә ҡатын **2.** ирҙәргә (ир кешегә) оҡшаған, ирҙәргә хас, ир кеше һымаҡ; **мужеподо́бное лицо́** ирҙәргә оҡшаған йөҙ

**МУ́ЖЕСТВЕННОСТЬ** *ж* ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, егетлек; **му́жественность во́ина** һуғышсының батырлығы; **прояви́ть му́жественность** егетлек күрһәтеү

**МУ́ЖЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое батыр, ҡыйыу, йөрәкле; **му́жественный челове́к** йөрәкле кеше; **му́жественный взгляд** ҡыйыу ҡараш

**МУ́ЖЕСТВО** *с* ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, йөрәклелек; **прояви́ть му́жество** батырлыҡ күрһәтеү

**МУЖИ́К** *м* **1.** *уст.* (*крестьянин*) ауыл кешеһе, мужик **2.** *прост.* (*мужчина*) ир, ир кеше; **де́льный мужи́к** эшлекле ир

**МУЖИКОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое (*грубоватый, простоватый*) бер ҡатлы, артыҡ ябай, тупаҫ, килбәтһеҙ; **мужикова́тое обраще́ние** тупаҫ мөғәмәлә; **мужикова́тая похо́дка** килбәтһеҙ атлап йөрөү

**МУЖИ́ЦКИЙ,** -ая, -ое **1.** *уст., прост.* крәҫтиән(дәр) ...ы; **мужи́цкая изба́** крәҫтиән өйө; **мужи́цкий сын** крәҫтиән улы **2.** килбәтһеҙ, тупаҫ; **мужи́цкая нару́жность** килбәтһеҙ тышҡы ҡиәфәт; **мужи́цкое обраще́ние** тупаҫ мөғәмәлә

**МУЖСКО́Й,** -ая, -ое **1.** ир(ҙәр) ...ы, ир-ат ...ы; **мужско́й костю́м** ирҙәр костюмы; **мужска́я компа́ния** ир-ат компанияһы **2.** ирҙәргә хас, ирҙәрҙеке кеүек; **мужско́й посту́пок** ирҙәргә хас ҡыланыш ♦ **мужска́я ри́фма** *лит.* ирҙәр рифмаһы (*баҫым һуңғы ижеккә төшкән рифма*)

**МУЖЧИ́НА** *м* ир, ир кеше, ир-ат

**МУ́ЗА** *ж* **1.** муза (*миф. боронғо гректарҙа фән һәм сәнғәтте яҡлаусы*) **2.** *трад.-поэт.* илһам, шиғри, ижади

**МУЗЕЕВЕ́Д** *м* музей белгесе

**МУЗЕЕВЕ́ДЕНИЕ** *с* музей фәне, музей ғилеме

**МУЗЕ́Й** *м* музей; **краеве́дческий музе́й** тыуған яҡты өйрәнеү музейы

**МУЗЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое музей ...ы; **музе́йный экспона́т** музей экспонаты ♦ **музе́йная ре́дкость**:

1) бик һирәк осрай торған нәмә; 2) *ирон.* хан заманынан ҡалған кәрәкһеҙ нәмә

**МУЗИЦИ́РОВАНИЕ** *с см.* **музици́ровать**

**МУЗИЦИ́РОВАТЬ** *несов.* музыка менән шөғөлләнеү, музыка ҡоралында уйнау; **музици́ровать вечера́ми** кистәрен музыка менән шөғөлләнеү

**МУ́ЗЫКА** *ж* **1.** музыка, көй, моң; **инструмента́льная му́зыка** инструменталь музыка; **му́зыка Чайко́вского** Чайковский музыкаһы; **прия́тная му́зыка** күңелле көй **2.** *перен.* моң, аһәңлелек, көй; **му́зыка стиха́** шиғырҙың аһәңлелеге

**МУЗЫКА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** музыкаға һәләтле (зирәк) булыу; **музыка́льность ребёнка** баланың музыкаға һәләтле булыуы **2.** көйлөлөк, моңлолоҡ; **музыка́льность произведе́ния** әҫәрҙең көйлөлөгө (*ҡолаҡҡа ятышлы булыуы*)

**МУЗЫКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** музыка ...ы; **музыка́льная шко́ла** музыка мәктәбе **2.** музыкаль, моңло; **музыка́льный о́браз** музыкаль образ; **музыка́льный го́лос** моңло тауыш **3.** музыкаға һәләтле; **музыка́льный ребёнок** музыкаға һәләтле бала ♦ **музыка́льная коме́дия** музыкаль комедия, оперетта

**МУЗЫКА́НТ** *м* музыкант

**МУЗЫКОВЕ́Д** *м* музыковед, музыка белгесе

**МУЗЫКОВЕ́ДЕНИЕ** *с* музыка фәне

**МУЗЫКОЗНА́НИЕ** *с см.* **музыкове́дение**

**МУ́КА** *ж* яфа, ғазап, интегеү; **му́ки ре́вности** көнләшеү ғазаптары; **му́ки тво́рчества** ижад ғазаптары ♦ **му́ка му́ченическая** бик ныҡ интегеү (яфаланыу)

**МУКА́** *ж* он; **пшени́чная мука́** бойҙай оно; **фосфори́тная мука́** фосфорит оно

**МУКОМО́Л** *м* тирмәнсе, он тартыусы

**МУКОМО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** он тартыу (етештереү); **мукомо́льная промы́шленность** он етештереү сәнәғәте **2.** тирмән ...ы; **мукомо́льный жёрнов** тирмән ташы

**МУКОМО́ЛЬНЯ** *ж* он тартыу предприятиеһы (бинаһы), тирмән

**МУКСУ́Н** *м* муксун (*балыҡ*)

**МУЛ** *м* ҡасыр

**МУЛА́Т** *м* и **МУЛА́ТКА** *ж* мулат (*негр менән аҡ тәнле кеше ҡушылыуынан тыуған быуын*)

**МУЛИНЕ́** *с нескл.* мулинә; **вы́шить салфе́тку цветны́м мулине́** төҫлө мулинә менән сигеү

**МУЛЛА́** *м* мулла

**МУЛЬТИМИЛЛИОНЕ́Р** *м* мультимиллионер

**МУЛЬТИПЛИКА́ТОР** *м* мультипликатор (**1.** *күп объективлы фотокамера* **2.** *мультипликация буйынса белгес*)

**МУЛЬТИПЛИКАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое *кино.* мультипликацион; **мультипликацио́нный фильм** мультипликацион фильм

**МУЛЬТИПЛИКА́ЦИЯ** *ж*; *кино.* мультипликация (**1.** *хәрәкәттең айырым моменттарын күрһәтеүсе һүрәттәрҙән төшөрөп алынған фильм, шулай төшөрөлә торған һүрәттәр йәки ҡурсаҡтар* **2.** *шундай ысул менән төшөрөлгән фильм*)

**МУЛЬТФИ́ЛЬМ** *м*; *кино.* мультфильм, йәнһүрәт

**МУ́ЛЬЧА** *ж*; *с.-х.* мульча (*сүп үләне үҫмәһен һәм дым кипмәһен өсөн тупраҡҡа йәйелә торған материал: торф, һалам, тиреҫ, ҡағыҙ*)

**МУЛЬЧИ́РОВАНИЕ** *с*; *с.-х. см.* **мульчи́ровать**

**МУЛЬЧИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *с.-х.* мульча ҡаплау, мульча йәйеү; **мульчи́ровать ози́мую пшени́цу** ужым бойҙайы баҫыуына мульча йәйеү

**МУЛЯ́Ж** *м* муляж (*әйберҙәрҙең натураль ҙурлыҡтағы моделе*); **восково́й муля́ж я́блока** балауыҙҙан (яһалған) алма муляжы

**МУМИЁ** *с нескл.* мумиё (*тау бәлзәме, дауаланыу өсөн ҡулланыла*)

**МУМИФИКА́ЦИЯ** *ж см.* **мумифици́ровать**

**МУМИФИЦИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* мумиялау, мумияға әйләндереү (*мәйетте*)

**МУМИФИЦИ́РОВАТЬСЯ** **1.** *сов., несов.* мумияланыу, мумияға әйләнеү **2.** *несов. страд. от* **мумифици́ровать**

**МУ́МИЯ I** *ж* мумия (**1.** *серемәйенсә һаҡланған мәйет* **2.** *күсм. кипкән мәйеткә оҡшаған кеше, үтә ябыҡ кеше*)

**МУ́МИЯ II** *ж* мумия (*ҡыҙыл төҫтәге буяуҙың бер төрө*)

**МУНДИ́Р** *м* мундир; **офице́рский мунди́р** офицер мундиры; **пара́дный мунди́р** парад мундиры ♦ **карто́шка в мунди́ре** ҡабығы менән бешерелгән картуф

**МУНДШТУ́К** *м* **1.** мөштөк; **янта́рный мундшту́к** гәрәбә мөштөк; **мундшту́к фле́йты** флейта мөштөгө **2.** (*удила*) ауыҙлыҡ, айыссыҡ; **ло́шадь грызёт желе́зо мундштука́** ат ауыҙлыҡ тимерен сәйнәй

**МУНИЦИПАЛИЗА́ЦИЯ** *ж* муниципализация (*айырым кешеләр ҡулындағы ерҙең, мөлкәттең хөкүмәт тарафынан урындағы үҙидара ҡарамағына бирелеүе*)

**МУНИЦИПАЛИЗИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* муниципаллә́штереү

**МУНИЦИПАЛИТЕ́Т** *м* муниципалитет (*урындағы үҙидара*)

**МУНИЦИПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** муниципалитет ...ы; **муниципа́льное зда́ние** муниципалитет бинаһы **2.** муниципалләштерелгән; **муниципа́льная со́бственность** муниципалләштерелгән милек

**МУРАВА́ I** *ж* ҡуйы йәшел (хәтфә) үлән; **тропа́, заро́сшая мураво́й** хәтфә үлән менән ҡапланған һуҡмаҡ

**МУРАВА́ II** *ж*; *спец.* (*глазурь*) мурава (*балсыҡтан эшләнгән һауытты ялтырата торған лак*)

**МУРАВЕ́Й** *м* ҡырмыҫҡа; **лесно́й мураве́й** урман ҡырмыҫҡаһы

**МУРАВЕ́ЙНИК** *м* **1.** ҡырмыҫҡа иләүе **2.** (*медведь*) ҡырмыҫҡа айыуы

**МУРА́ВИТЬ** *несов. что*; *спец.* мурава менән ҡаплау (ялтыратыу); **мура́вить посу́ду** һауыт-һабаны мурава менән ялтыратыу

**МУРА́ВЛЕНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* мурава менән ялтыратылған, мурава (ялтырауыҡ) йүгертелгән; **мура́вленый изразе́ц** мурава йүгертелгән сынаяҡ кирбес (кафель)

**МУРАВЬЕ́Д** *м* ҡырмыҫҡа ашаусы

**МУРАВЬИ́НЫЙ,** -ая, -ое ҡырмыҫҡа ...ы; **муравьи́ные я́йца** ҡырмыҫҡа йомортҡалары ♦ **муравьи́ная кислота́** ҡырмыҫҡа кислотаһы; **муравьи́ный спирт** ҡырмыҫҡа спирты

**МУРА́ШКИ: мура́шки бе́гают по спине́ (по те́лу и т.п.)** тән сымырлай

**МУРЗА́** *м*; *ист.* мырҙа

**МУРЛЫ́КА** *м* и *ж*; *разг.* мыяуҡай, мыяубикә

**МУРЛЫ́КАНЬЕ** *с см.* **мурлы́кать**

**МУРЛЫ́КАТЬ** *несов.* **1.** мырлау, мырылдау, мыр-мыр итеү (килеү); **котёнок мя́гко мурлы́чет** бесәй балаһы йомшаҡ ҡына мырылдай **2.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* әкрен генә көйләү, мөңгөрләү

**МУРОВА́ТЬ** *несов. что* таш (кирбес) менән ҡаплау; **мурова́ть сте́ну** таш стена ҡуйыу

**МУРУ́ГИЙ,** -ая, -ое (*о масти животных*) көрән, ҡара көрән; **муру́гий бык** көрән үгеҙ

**МУСКА́Т** *м* **1.** (*мускатный орех*) мөшкәт, мөшкәт сәтләүеге; **толо́чь в сту́пе кори́цу и муска́т** килелә дәрсен һәм мөшкәт төйөү **2.** (*сорт винограда*) мөшкәт; **гро́здья муска́та** мөшкәт тәлгәштәре **3.** (*сорт вина*) мөшкәт; **бока́лы со сла́дким муска́том** шәрбәтле мөшкәт һалынған бокалдар

**МУСКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое мөшкәт ...ы; **муска́тный сорт виногра́да** йөҙөмдөң мөшкәт сорты; **муска́тное вино́** мөшкәт шарабы ♦ **муска́тный оре́х** мөшкәт сәтләүеге

**МУ́СКУЛ** *м* мускул, һум ит; **ра́звитые му́скулы** ныҡ үҫешкән мускулдар

**МУСКУЛАТУ́РА** *ж* мускулатура, мускулдар; **развива́ть мускулату́ру** мускулдарҙы ныҒытыу

**МУ́СКУЛИСТЫЙ** и *разг.* **МУСКУЛИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ныҡ мускуллы; **му́скулистое те́ло** ныҡ мускуллы кәүҙә

**МУ́СКУЛЬНЫЙ,** -ая, -ое мускул ...ы; **му́скульная си́ла** мускул көсө

**МУ́СКУС** *м* мисек (*еҫле матдә, парфюмерияла ҡулланыла*)

**МУ́СКУСНЫЙ,** -ая, -ое мисек ...ы; **му́скусный за́пах** мисек еҫе; **му́скусная железа́** мисек биҙе

**МУСЛИ́Н** *м* муслин (*туҡыма*); **шёлковый мусли́н** ебәк муслин

**МУСЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое муслин ...ы; **мусли́новая ткань** муслин туҡыма; **мусли́новое пла́тье** муслин күлдәк

**МУСО́ЛИТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** *что* төкөрөкләү, һыулау; **рисова́ть, мусо́ля карандаш** ҡәләмде төкөрөкләп һүрәт төшөрөү **2.** *что* төкөрөкләп бысратыу; **мусо́лить кни́гу** китапты төкөрөкләп бысратып бөтөрөү **3.** *что* и *без доп.*; *перен.* оҙаҡ тылҡыу, күп һөйләү; **мусо́лить оди́н и тот же вопро́с** бер үк нәмәне оҙаҡ тылҡыу (һөйләү)

**МУ́СОР** *м* сүп, сүп-сар; **чи́стить от му́сора** сүп-сарҙан таҙартыу

**МУ́СОРИТЬ** *несов.* сүпләү

**МУ́СОРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сүп ...ы, сүп-сар ...ы; **му́сорная ку́ча** сүп-сар өйөмө; **му́сорное ведро́** сүп биҙрәһе **2.** *разг.* сүпле, сүп-сарлы

**МУСОРОПРОВО́Д** *м* сүп сығарыу торбаһы, сүп үткәргес

**МУСОРОУБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое сүп йыйыу ...ы; **мусороубо́рочная маши́на** сүп йыйыу машинаһы

**МУСС** *м* мусс (*еләк-емештән әҙерләнгән татлы ашамлыҡ*); **я́блочный мусс** алма мусы

**МУССИ́РОВАТЬ** *несов.* **1.** *что*; *спец.* (*взбивать пену*) күпертеү, ҡабартыу; **мусси́ровать напи́ток** эсемлекте күпертеү **2.** *спец.* бызырлау; **вино́ мусси́рует** шарап бызырлап тора **3.** *что*; *перен.*, *книжн.* ҡабартыу, арттырып ебәреү; **мусси́ровать опасе́ния** шикләнеүҙәрҙе арттырып ебәреү

**МУССО́Н** *м* муссон (*йәй диңгеҙҙән, ҡыш ҡоро ерҙән иҫкән ел*); **ле́тний муссо́н** йәйге муссон

**МУСТА́НГ** *м* мустанг, ҡырағайланған өй аты

**МУСУЛЬМА́НИН** *м* и **МУСУЛЬМА́НКА** *ж* мосолман

**МУСУЛЬМА́НСКИЙ,** -ая, -ое мосолман ...ы; **мусульма́нские обы́чаи** мосолман ғөрөф-ғәҙәттәре

**МУСУЛЬМА́НСТВО** *с* мосолманлыҡ, ислам

**МУТАГЕ́Н** *м*; *спец.* мутаген (*мутация тыуҙыра торған шарттар*)

**МУТА́НТ** *м*; *биол.* мутант (*мутация нигеҙендә тыуған хайуан йәки үҫемлек*); **мута́нты пшени́цы** бойҙай мутанттары

**МУТА́НТНЫЙ,** -ая, -ое *биол.* мутант; **мута́нтные сорта́ пшени́цы** бойҙайҙың мутант сорттары

**МУТАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое мутация ...ы; **мутацио́нные измене́ния** мутация үҙгәрештәре

**МУТА́ЦИЯ** *ж* мутация (**1.** *берәй нәмәнең кинәт үҙгәреүе* **2.** *биол. организмдың ҡапыл хасил булған генетик үҙенсәлектәренең үҙгәреүе* **3.** *балиғ булыу осоронда үҫмер малайҙар тауышының ҡапыл үҙгәреүе*)

**МУТИ́ТЬ** *несов.* **1.** *что* болғансыҡлау; **мути́ть во́ду** һыуҙы болғансыҡлау **2.** *кого-что*; *перен.* болғатыу, болартыу; **мути́ть наро́д** халыҡты

болартыу **3.** *что*; *перен.* томалау, ҡараңғылау; **боль мути́т созна́ние** һыҙланыу зиһенде томалай **4.** *кого безл.*; *разг.* күңел болғаныу; **меня́ мути́т от э́того за́паха** был еҫтән күңелем болғана

**МУТИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** болғансыҡланыу; **вода́ мути́тся** һыу болғансыҡлана **2.** *перен.* томаланыу, ҡараңғыланыу; **мы́сли мутя́тся** уйҙар томалана **3.** *страд. от* **мути́ть** 1 ♦ **мути́тся в голове́** баш әйләнә; **мути́тся свет в глаза́х** күҙ алды ҡараңғылана

**МУТНЕ́ТЬ** *несов. см.* **мути́ться** 1, 2

**МУ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** болғансыҡ, буръяҡ; **му́тная вода́** болғансыҡ һыу **2.** тоноҡ, үтә күренмәй торған; **му́тное стекло́** тоноҡ быяла; **му́тные глаза́** тоноҡ күҙҙәр **3.** томанлы, бөләңгерт; **му́тное не́бо** күк йөҙө бөләңгерт **4.** *перен.* (*о сознании, разуме*) томанлы, сыуалсыҡ, ҡараңғы, тонған; **му́тная голова́** тонған баш ♦ **в му́тной воде́ ры́бу лови́ть** болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоу (*кеше ҡазаһынан файҙаланып ҡалыу*)

**МУТО́ВКА** *ж* **1.** *бот.* таҡыя, суҡ (*үҫемлектәрҙә*); **ве́рхняя муто́вка де́рева заде́рживает на себе́ па́дающий снег** ағастың өҫкө таҡыяһы яуған ҡарҙы үҙендә тотоп ҡала **2.** болғауыс, бешкәк; **взбива́ть кумы́с муто́вкой** бешкәк менән ҡымыҙ бешеү

**МУТО́Н** *м* мутон (*махсус эшкәртелгән һарыҡ тиреһе*); **воротни́к из муто́на** мутон яға

**МУТО́НОВЫЙ,** -ая, -ое мутон, мутондан тегелгән; **муто́новая шу́ба** мутон тун

**МУ́ТОРНО 1.** *нареч. см.* **му́торный 2.** *в знач. сказ., безл.*; *прост.* күңелһеҙ, эс бошорғос, яманһыу; **на душе́ му́торно** күңелдә яманһыу

**МУ́ТОРНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* эс бошорғос, күңелһеҙ; **му́торное состоя́ние** эс бошорғос хәл; **му́торная рабо́та** күңелһеҙ эш

**МУТЬ** *ж* **1.** ҡуйырыҡ, юшҡын, ултырма **2.** *перен.* томан, буталсыҡ уйҙар; **муть в голове́** башта буталсыҡ уйҙар **3.** *перен.*, *разг.* юҡ (буш) нәмәләр, юҡ-бар; **в го́лову ле́зет вся́кая муть** башҡа һәр төрлө юҡ-бар инә

**МУФЛО́Н** *м* муфлон (*Урта диңгеҙ утрауҙарында йәшәгән ҡырағай һарыҡ*)

**МУ́ФТА** *ж* муфта; **держа́ть ру́ки в му́фте** ҡулдарҙы муфта эсендә тотоу; **ка́бельная му́фта** *тех.* кабель тоташтырыусы муфта

**МУ́ФТИЙ** *м* мөфтөй (*мосолмандарҙа дини идара башлығы*)

**МУ́ХА** *ж* себен; **ко́мнатная му́ха** өй себене ♦ **му́хи мрут (до́хнут)** күңелһеҙ, эс бошоу; **му́хи не оби́дит** *кто* себенде лә рәнйетмәҫ, кешегә тырнаҡ осондай ҙа зыяны юҡ (*йыуаш кешегә ҡарата*); **де́лать из му́хи слона́** төймәне дөйәләй итеү; **(кака́я) му́ха укуси́ла** *кого* ниндәй себен тешләне (*кәйефе киткән, асыулы кешегә ҡарата*)

**МУХОЛО́ВКА** *ж* **1.** себен тотҡос (*йәйләнмә*) **2.** *зоол.* себен турғайы **3.** *бот.* тырҡыш, себен аулаусы (*үлән*)

**МУХОМО́Р** *м* мухомор (*бәшмәк*); **я́рко-кра́сный мухомо́р** асыҡ ҡыҙыл төҫтәге мухомор

**МУХО́РТЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) кир; **мухо́ртый конь** кир ат

**МУЧЕ́НИЕ** *с* ыҙа, ғазап, яфа, михнәт; **муче́ния ре́вности** көнләшеү ғазаптары

**МУ́ЧЕНИК** *м* и **МУ́ЧЕНИЦА** *ж* ыҙа (ғазап, яфа) сигеүсе

**МУ́ЧЕНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое интеккән, яфа сиккән, ғазаплы; **му́ченическая смерть** ғазаплы үлем; **му́ченический вид** интеккән ҡиәфәт

**МУ́ЧЕНИЧЕСТВО** *с* ыҙа күреү, интегеү, яфа сигеү; **обре́чь на му́ченичество** яфа сигеүгә дусар итеү, яфаға һалыу

**МУЧИ́ТЕЛЬ** *м* и **МУЧИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* интектереүсе, яфалаусы, ғазаплаусы

**МУЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое интектергес, ғазаплы, яфалы, ауыр (кисерешле); **мучи́тельная зубна́я боль** интектергес теш һыҙлауы; **мучи́тельный вопро́с** ауыр, ғазаплы мәсьәлә

**МУ́ЧИТЬ** *несов. кого-что* интектереү, ғазаплау, яфалау, яфаландырыу, ыҙалау, ыҙалатыу, йонсотоу; **му́чит зубна́я боль** теш һыҙлау ыҙалата; **му́чить го́лодом** астан интектереү; **му́чить тяжёлой рабо́той** ауыр эш менән йонсотоу

**МУ́ЧИТЬСЯ** *несов.* интегеү, яфаланыу, яфа сигеү, ғазапланыу, ыҙаланыу, ыҙа сигеү; **му́читься от головно́й бо́ли** баш ауыртыуҙан интегеү; **му́читься сомне́ниями** икеләнеүҙәр менән ғазапланыу

**МУЧНИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** онло, крахмаллы; **мучни́стое зерно́** онло ашлыҡ; **мучни́стый карто́фель** крахмаллы картуф **2.** онға оҡшаш; **мучни́стый налёт на расте́нии** үҫемлектәге онға оҡшаш ҡатлам ♦ **мучни́стая роса́** онло ысыҡ (*үҫемлек ауырыуының төрө, онға оҡшаш ҡатлам барлыҡҡа килә*)

**МУЧНО́Й,** -ая, -ое **1.** он ...ы; **мучно́й мешо́к** он тоҡо; **мучно́й склад** он келәте **2.** ҡамыр ...ы; **мучны́е блю́да** ҡамыр ашамлыҡтары **3.** *в знач. сущ.* **мучно́е** *с* ҡамыр ашы

**МУШИ́НЫЙ,** -ая, -ое себен ...ы; **муши́ный рой** себен өйөрө; **муши́ное жужжа́ние** себен безелдәүе

**МУ́ШКА I** *ж* **1.** *уменьш. от* **му́ха** **2.** (*искусственная родинка*) яһалма миң; **му́шка на ле́вой щеке́** һул биттәге яһалма миң

**МУ́ШКА II** *ж*; *воен.* сәп, мушка; **му́шка ружья́** мылтыҡ мушкаһы

**МУШКЕ́Т** *м* мушкет (*боронғо мылтыҡ төрө*)

**МУШКЕТЁР** *м*; *ист.* мушкетёр (*мушкет менән ҡоралланған һалдат*)

**МУШМУЛА́** *ж* мүшмел; **за́росли мушмулы́** мүшмел ҡыуаҡлығы; **варе́нье из мушмулы́** мүшмел ҡайнатмаһы

**МУШТРА́** *ж* муштра (*тәрбиә ысулы*)

**МУШТРОВА́ТЬ** *несов. кого-что* муштралау (*таяҡ менән өйрәтеү*); **муштрова́ть солда́т** һал-

даттарҙы муштралау; **муштрова́ть ученико́в** уҡыусыларҙы муштралау

**МУЭДЗИ́Н** *м* мәзин

**МЧАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* елдереү, саптырыу, елдереп барыу, елдертеп алып барыу; **ло́шади мча́ли вса́дников** һыбайлыларҙы аттар елдертеп алып барҙы **2.** *см.* **мча́ться**

**МЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** елдереү, сабыу, бик тиҙ (шәп) барыу; **мча́ться на коне́** атта сабыу; **по́езд мчи́тся** поезд бик шәп бара **2.** *перен.* (*о времени*) тиҙ үтеү (уҙыу); **го́ды мча́тся** йылдар тиҙ үтә; **мчи́тся вре́мя** ваҡыт тиҙ уҙа

**МША́НИК** *м* мүкләп (күтәрелгән) һарай; **постро́ить мша́ник** мүкләп һарай эшләү

**МШИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** мүкле, мүк баҫҡан; **мши́стое боло́то** мүкле һаҙлыҡ **2.** мүккә оҡшаш; **мши́стая трава́** мүккә оҡшаш үлән

**МЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **мстить**; **мще́ние за оби́ду** рәнйеткән өсөн үс алыу **2.** (*месть*) үс

**МЫ** *мн.* (нас, нам, нас, нами, о нас) *мест.* беҙ; **нас бы́ло дво́е** беҙ икәү инек

**МЫ́КАТЬ: го́ре мы́кать** интегеү, ғазап (яфа, михнәт) сигеү

**МЫ́КАТЬСЯ** *несов.*; *прост.* интегеп (ғазап сигеп) йөрөү, нужа күреү; **мы́каться по све́ту** йортһоҙ-ерһеҙ ғазап сигеп йөрөү

**МЫ́ЛИТЬ** *несов. кого-что* һабын һөртөү, һабынлау; **мы́лить ру́ки** ҡулды һабынлау; **мы́лить во́ду** һыуҙы һабынлау

**МЫ́ЛИТЬСЯ** *несов.* **1.** (*мылить себя*) һабынланыу; **мы́литься с головы́ до ног** баштан аяҡҡа тиклем һабынланыу **2.** күбекләнеү; **э́то мы́ло хорошо́ мы́лится** был һабын һәйбәт күбекләнә; **мя́гкая вода́ хорошо́ мы́лится** йомшаҡ һыу һәйбәт күбекләнә **3.** *страд. от* **мы́лить**

**МЫ́ЛКИЙ,** -ая, -ое яҡшы күбекләнә торған; **мы́лкое мы́ло** яҡшы күбекләнә торған һабын

**МЫ́ЛО** *с* **1.** һабын; **жи́дкое мы́ло** шыйыҡ һабын; **хозя́йственное мы́ло** кер һабыны; **туале́тное мы́ло** еҫле һабын, күҙ һабыны **2.** (*белая пена у лошади*) аҡ күбек (*ҡыҙыу сапҡан атта*); **ко́ни в мы́ле** аҡ күбеккә батҡан аттар

**МЫЛОВА́Р** *м* һабын ҡайнатыусы

**МЫЛОВАРЕ́НИЕ** *с* һабын ҡайнатыу, һабын етештереү

**МЫЛОВА́РЕННЫЙ,** -ая, -ое һабын ...ы; **мылова́ренный заво́д** һабын заводы; **мылова́ренная промы́шленность** һабын (етештереү) сәнәғәте; **мылова́ренный чан** һабын ҡайнатыу шаңы

**МЫЛОВА́РНЯ** *ж* һабын (етештереү) предприятиеһы

**МЫ́ЛЬНИЦА** *ж* һабын һауыты; **мы́льница из пластма́ссы** пластмасса һабын һауыты

**МЫ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һабын ...ы, һабынлы; **мы́льный за́пах** һабын еҫе; **мы́льная вода́** һабынлы һыу; **мы́льные ру́ки** һабынлы ҡулдар ♦ **мы́льный пузы́рь** буш ҡыуыҡ (*буш нәмә, буш хыял*); **мы́льный ко́рень** *бот.* һабын үләненең тамыры

**МЫЛЬНЯ́НКА** *ж* һабын үләне

**МЫС** *м*; *геогр.* морон; **мыс вреза́ется в ре́ку** морон йылғаға инеп тора

**МЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое уйҙағы, күңелдәге, баштағы; **мы́сленный о́браз** уйҙағы образ

**МЫ́СЛИМЫЙ,** -ая, -ое булыуы мөмкин булған, башҡа һыйҙыра алырлыҡ булған ♦ **мы́слимое ли де́ло?** был эштең булыуы мөмкинме?

**МЫСЛИ́ТЕЛЬ** *м* фекер (аҡыл) эйәһе, тәрән аҡыллы кеше; **дре́вние мысли́тели** боронғо аҡыл эйәләре

**МЫСЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое фекерләү ...ы, фекер йөрөтөү ...ы; **мысли́тельные спосо́бности челове́ка** кешенең фекер йөрөтөү һәләттәре

**МЫ́СЛИТЬ** *несов.* фекерләү, уйлау, фекер (уй) йөрөтөү; **пра́вильно мы́слить** дөрөҫ фекер йөрөтөү

**МЫ́СЛИТЬСЯ** *несов.* уйланыу, фекер йөрөтөү, күҙ алдына килтереү; **ра́ньше тако́й разгово́р и мы́слиться не мог** элек шундай һөйләшеүҙе күҙ алдына ла килтерергә мөмкин түгел ине

**МЫСЛЬ** *ж* **1.** фекерләү, фекер йөрөтөү; **ход мы́сли** фекер йөрөтөү юлы **2.** фекер, аҡыл, идея; **глубо́кая мысль** тәрән фекер **3.** белем, фекер, фекерләү; **констру́кторская мысль** конструкторҙар фекере; **техни́ческая мысль** техник фекерләү **4.** уй; **погрузи́ться в мы́сли** уйға батыу **5.** *мн.* **мы́сли** (*убеждения*) фекер, ҡараш; **расхожде́ния в мы́слях** ҡараштағы айырымлыҡтар

**МЫ́СЛЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **мы́слить** **2.** *прил.* аҡыллы, дөрөҫ фекерләүсе, фекерле; **мы́слящий челове́к** фекерле (һәләтле) кеше

**МЫТ** *м*; *вет.* һаҡау (*йылҡы ауырыуы*)

**МЫТА́РИТЬ** *несов. кого-что*; *прост.* тормош ғазабы күрһәтеү, интектереү, йөҙәтеү

**МЫТА́РИТЬСЯ** *несов.*; *прост.* интегеү, ғазап (михнәт) сигеү, яфаланыу, нужа күреү

**МЫТА́РСТВО** *с* аҙап, ғазап, яфа, михнәт; **доро́жные мыта́рства** юл ғазаптары

**МЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **мыть** **2.** *прил.* йыуған, йыуылған; **мы́тый пол** йыуылған иҙән

**МЫТЬ** *несов. кого-что* йыуыу; **мыть лицо́** битте йыуыу ♦ **мыть зо́лото** *спец.* алтын йыуыу

**МЫТЬЁ** *с см.* **мыть**, **мы́ться** 1 ♦ **не мытьём, так ка́таньем** нисек кенә итеп булһа ла

**МЫ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** йыуыныу; **мы́ться в ба́не** мунсала йыуыныу **2.** *страд. от* **мыть**

**МЫЧА́НИЕ** *с* **1.** мөңрәү, баҡырыу; **мыча́ние коро́вы** һыйыр мөңрәүе **2.** *перен.*; *разг.* мығырлау, мөңрәү, мыңғырлау; **на вопро́сы отвеча́ть мыча́нием** һорауға мығырлап яуап биреү

**МЫЧА́ТЬ** *несов.* **1.** мөңрәү, баҡырыу **2.** *перен.*, *разг.* мығырлау, мыңғырлау; **мыча́л что́-то неопределённое** ул ниҙер мығырланы

**МЫША́СТЫЙ,** -ая, -ое (*о масти лошади*) һоро; **мыша́стый жеребёнок** һоро ҡолон

**МЫШЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **мышеобра́зный**

**МЫШЕЛО́ВКА** *ж* **1.** сысҡан ҡапҡаны, тәпе; **поста́вить мышело́вку** сысҡанға ҡапҡан ҡороу **2.** *перен.* ҡапҡан, тоҙаҡ; **по нео́пытности попа́сть в мышело́вку** тәжрибәһеҙлек арҡаһында ҡапҡанға эләгеү

**МЫШЕОБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое сысҡан һымаҡ; **мышеобра́зные грызуны́** сысҡан һымаҡ кимереүселәр

**МЫ́ШЕЧНЫЙ,** -ая, -ое мускул ...ы; **мы́шечная ткань** мускул туҡымаһы

**МЫШИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** сысҡан ...ы; **мыши́ный хвост** сысҡан ҡойроғо **2.** сысҡанға оҡшаш, сысҡандыҡы кеүек; **мыши́ное ли́чико** сысҡандыҡы кеүек бәләкәй йөҙ **3.** (*о цвете*) һоро, сысҡан төҫлө; **мыши́ный мунди́р** һоро мундир ♦ **мыши́ная возня́ (сует́а)** юҡ эш менән булышыу

**МЫ́ШКА I** *ж*; *уменьш.-ласк. от* **мышь**

**МЫ́ШКА II: под мы́шками (мы́шкой)** ҡултыҡ аҫтында; **под мы́шки (мы́шку)** ҡултыҡ аҫтына

**МЫШКОВА́ТЬ** *несов.* (*о животных*) сысҡан аулау; **лиси́ца мышку́ет** төлкө сысҡан аулай

**МЫШЛЕ́НИЕ** и **МЫ́ШЛЕНИЕ** *с* уйлау, фекерләү, уй (фекер) йөрөтөү; **нау́чное мышле́ние** ғилми фекер йөрөтөү; **мозг — о́рган мышле́ния** мейе — фекерләү органы

**МЫШО́НОК** *м* сысҡан балаһы

**МЫ́ШЦА** *ж* мускул; **мы́шца се́рдца** йөрәк мускулы

**МЫШЬ** *ж* сысҡан; **домо́вая мышь** өй сысҡаны; **полева́я мышь** ҡыр сысҡаны ♦ **как мышь на крупу́ наду́лся** турһайған, үсеккән

**МЫШЬЯ́К** *м* мышаяҡ (**1.** *хим. ағыулы матдә* **2.** *шунан яһалған дарыу*)

**МЫШЬЯКО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мышаяҡ ...ы; **мышьяко́вый препара́т** мышаяҡ препараты **2.** мышаяҡлы; **мышьяко́вые ру́ды** мышаяҡлы мәғдәндәр

**МЭР** *м* мэр (*муниципалитет башында тороусы*); **мэр го́рода** ҡала мэры

**МЭ́РИЯ** *ж* мэрия (*муниципаль идаралыҡ, шул идаралыҡ урынлашҡан йорт*)

**МЮЗИК-ХО́ЛЛ** *м* мюзик-холл (*эстрада театры*)

**МЮРИ́Д** *м* мөрит (*ислам динендә әһеленә эйәрсән булған кеше, шәкерт*)

**МЯ́ГКИЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* йомшаҡ; **мя́гкая посте́ль** йомшаҡ түшәк; **мя́гкие щёки** йомшаҡ бит; **мя́гкие ру́ки** йомшаҡ ҡулдар; **мя́гкая шерсть** йомшаҡ йөн; **мя́гкий воск** йомшаҡ балауыҙ; **мя́гкая гли́на** йомшаҡ балсыҡ; **мя́гкий хлеб** йомшаҡ икмәк; **мя́гкий го́лос** йомшаҡ тауыш; **мя́гкие движе́ния** йомшаҡ хәрәкәттәр; **мя́гкий хара́ктер** йомшаҡ холоҡ; **мя́гкая душа́** йомшаҡ күңел; **мя́гкий взгляд** йомшаҡ ҡараш; **мя́гкий пригово́р** йомшаҡ хөкөм; **мя́гкое обраще́ние** йомшаҡ мөғәмәлә; **мя́гкий упрёк** йомшаҡ шелтә; **мя́гкая зима́** йомшаҡ ҡыш; **мя́гкий кли́мат** йомшаҡ климат ♦ **мя́гкий ваго́н** йомшаҡ вагон; **мя́гкая вода́** йомшаҡ һыу; **мя́гкий знак** *лингв.* йомшаҡлыҡ билдәһе; **мя́гкие согла́сные зву́ки** *лингв.* нәҙек тартынҡы өндәр; **мя́гко выража́ясь (говоря́)** *в знач. вводн. сл.* йомшаҡ итеп әйткәндә

**МЯГКОСЕРДЕ́ЧИЕ** *с* и **МЯГКОСЕРДЕ́ЧНОСТЬ** *ж* йомшаҡ күңеллелек, шәфҡәтлелек; **прояви́ть мягкосерде́чие** йомшаҡ күңеллелек күрһәтеү

**МЯГКОСЕРДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое шәфҡәтле, йомшаҡ күңелле; **мягкосерде́чный челове́к** йомшаҡ күңелле кеше

**МЯ́ГКОСТЬ** *ж*; *прям.*, *перен.* йомшаҡлыҡ; **мя́гкость воды́** һыуҙың йомшаҡлығы; **мя́гкость воло́с** сәстәрҙең йомшаҡлығы; **мя́гкость кли́мата** климаттың йомшаҡлығы; **мя́гкость хара́ктера** холоҡтоң йомшаҡлығы

**МЯГКОТЕ́ЛОСТЬ** *ж* йомшаҡ холоҡлолоҡ, мәмәй ауыҙлылыҡ; **прояви́ть мягкоте́лость** йомшаҡ холоҡлолоҡ күрһәтеү

**МЯГКОТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *разг.* (*с полным телом*) итләс (йомшаҡ) тәнле, тулы итле **2.** *перен.* (*слабохарактерный*) йомшаҡ холоҡло, мәмәй ауыҙ **3.** *в знач. сущ.* **мягкоте́лые** *мн.*; *зоол.* йомшаҡ тәнлеләр (*моллюскылар*)

**МЯГКОШЁРСТНЫЙ** и **МЯГКОШЁРСТЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ йөнлө; **мягкошёрстные о́вцы** йомшаҡ йөнлө һарыҡтар

**МЯГЧЕ́ТЬ** *несов.*; *прост.* йомшарыу

**МЯГЧИ́ТЬ** *несов. что* йомшартыу; **крем мягчи́т ко́жу** крем тирене йомшарта

**МЯКИ́НА** *ж* кәбәк; **пшени́чная мяки́на** бойҙай кәбәге ♦ **на мяки́не не проведёшь** *кого* алдай алмаҫһың

**МЯКИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** кәбәк ...ы; **мяки́нная пыль** кәбәк туҙаны **2.** кәбәкле; **мяки́нный хлеб** кәбәкле икмәк

**МЯ́КИШ** *м* **1.** икмәк йомшағы; **мя́киш чёрного хле́ба** ҡара икмәк йомшағы **2.** табан аҫты йомшағы, тояҡ йомшағы; **подо́швенные мя́киши соба́ки** эттең табан аҫты йомшағы

**МЯ́КНУТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** ебеү, йомшарыу; **сухари́ мя́кнут в воде́** шөкәрә һыуҙа ебей; **ко́жи мя́кнут в раство́ре** тиреләр иретмәлә йомшара **2.** *перен.* ебеү, бәлйерәү, шәлпәйеү; **те́ло мя́кнет, старе́ет** тән шәлпәйә, ҡартая

**МЯ́КОТЬ** *ж* **1.** (тәндең) йомшаҡ ере; **пу́ля засе́ла в мя́коти спины́** пуля арҡаның йомшаҡ еренә инеп ултырған **2.** *разг.* һум ит; **купи́ть мя́коти на пельме́ни** билмәнгә һум ит һатып алыу **3.** йомшаҡ; **мя́коть арбу́за** ҡарбуз йомшағы

**МЯ́ЛКА** *ж* **1.** талҡы; **мять лён мя́лкой** талҡы менән етен талҡыу **2.** (*машина*) иҙгес, йом-

шарткыс; **мя́лка для гли́ны** балсык изгес; **мя́лка для кож** тире йомшарткыс

**МЯ́МЛИТЬ** *несов.*; *разг.* **1.** (*невнятно говорить*) ык-мык килеп һөйләү, мығырлау; **мя́млить от волне́ния** тулкынланыуҙан ык-мык килеп һөйләү **2.** (*нерешительно действовать*) ҡыйыуһыҙ ҡыймылдау, мәмәйләнеү, мыштырлау

**МЯ́МЛЯ** *м* и *ж*; *прост.* мәмәй (ауыҙ); **он же мя́мля** ул торғаны бер мәмәй

**МЯСИ́СТЫЙ,** -ая, -ое итләс; **мяси́стая ры́ба** итләс балык; **мяси́стое те́ло** итләс кәүҙә; **мяси́стые гу́бы** итләс ирендәр; **мяси́стые ви́шни** итләс сейәләр

**МЯСНИ́К** *м* ит һатыусы, итсе

**МЯСНО́Й,** -ая, -ое **1.** ит ...ы; **мясно́й за́пах** ит еҫе **2.** итле; **мясно́й пиро́г** итле бәлеш; **мясно́й суп** итле аш **3.** һуғым ...ы; **мясно́й скот** һуғым малы **4.** *в знач. сущ.* **мясно́е** *с* ит, итле ашамлыктар; **не употребля́ть мясно́е** ит ашамаҫка

**МЯ́СО** *с* ит; **кури́ное мя́со** тауык ите; **варёное мя́со** бешкән ит; **жа́реное мя́со** ҡыҙҙырылған ит; **вя́леное мя́со** ҡаҡлаған ит ♦ **с мя́сом вы́рвать (оторва́ть)** *что* ите менән йолҡоп алыу (*төймәне, ҡаптырманы һ.б.*)

**МЯСОЗАГОТОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ит әҙерләү ...ы; **мясозаготови́тельные организа́ции** ит әҙерләү ойошмалары

**МЯСОКОМБИНА́Т** *м* ит комбинаты

**МЯСОПОСТА́ВКИ** *мн.* (*ед.* **мясопоста́вка** *ж*) ит тапшырыу

**МЯСОРУ́БКА** *ж* ит үткәргес; **пропусти́ть мя́со че́рез мясору́бку** ит үткәргестән ит үткәреү

**МЯ́ТА** *ж* бөтнөк; **мя́та растёт по сыры́м места́м** бөтнөк еүеш урындарҙа үҫә; **напои́ть больно́го мя́той** ауырыуға бөтнөк эсереү

**МЯТЕ́Ж** *м* фетнә; **подави́ть мяте́ж** фетнәне баҫыу

**МЯТЕ́ЖНИК** *м* фетнәсе

**МЯТЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** фетнәсе ...ы; **мяте́жные отря́ды** фетнәселәр отряды **2.** *трад.-поэт.* тынғыһыҙ; **мяте́жные го́ды** тынғыһыҙ йылдар; **мяте́жная душа́** тынғыһыҙ күңел

**МЯ́ТЛИК** *м* бажат; **мя́тлик — хозя́ин лу́га** бажат — болон хужаһы

**МЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бөтнөк ...ы; **мя́тный за́пах** бөтнөк еҫе; **мя́тное ма́сло** бөтнөк майы **2.** бөтнөклө; **мя́тные ка́пли** бөтнөклө дарыу; **мя́тный пря́ник** бөтнөклө перәник

**МЯ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **мять 2.** *прил.* иҙелгән; **мя́тый карто́фель** иҙелгән картуф; **мя́тая я́года** иҙелгән еләк **3.** *прил.* (*об одежде*) таушалған, ойпаланған, төҫө ҡаҫҡан; **мя́тое пла́тье** таушалған күлдәк **4.** *прил.*; *перен.*, *разг.* (*утомлённый*, *изнурённый*) таушалған, йонсоған, йонсоу; **мя́тое от бессо́нницы лицо́** йоҡоһоҙлоҡтан йонсоған йөҙ

**МЯТЬ** *несов.* **1.** *что* баҫыу, иҙеү; **мять гли́ну** балсык иҙеү **2.** *что* (*одежду*) таушалдырыу, ойпалау; **мять костю́м** костюмды таушалдырыу **3.** *что*; *спец.* талкыу, йомшартыу; **мять лён** етен талкыу; **мять ко́жу** тире йомшартыу **4.** *кого-что*; *разг.* (*тискать*, *жать*) ҡыҫыу, ҡыҫҡылау

**МЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ойпаланыу, таушалыу, бөтәрләнеү; **шля́па мнётся** эшләпә таушала **2.** *перен., разг.* (*смущаться*) тартынып (ҡыйыуһыҙланып, икеләнеп) тороу; **мя́ться у поро́га от смуще́ния** оялыуҙан ишек төбөндә тартынып (икеләнеп) тороу **3.** *страд. от* **мять**

**МЯУ́КАНЬЕ** *с* мыяулау, мыйылдау; **мяу́канье ко́шки** бесәй мыяулауы

**МЯУ́КАТЬ** *несов.* мыяулау, мыяу-мыяу килеү, мыйылдау; **по ноча́м мяу́кают ры́си** төндәрен һеләүһендәр мыяулай

**МЯЧ** *м* туп; **футбо́льный мяч** футбол тубы; **игра́ть в мяч** туп уйнау

# Н

**НА I** *предлог* **1.** *с вин. п.* (*при обозначении предмета, на поверхность или внешнюю сторону которого направлено действие, движение с целью расположения, размещения кого-чего-л. на нём*) -ға/-гә, өҫтөнә, башына; **положи́ть кни́гу на стол** китапты өҫтәлгә ҡуйыу; **влезть на де́рево** ағасҡа менеү; **наде́ть на ребёнка пальто́** балаға пальто кейҙереү

**2.** *с вин. п.* (*при обозначении лиц, организаций, на которые ложится ответственность, работа и т.п., за которыми что-л. закрепляется*) -ға/-гә, өҫтөнә, исеменә; **свали́ть вину́ на друго́го** ғәйепте башҡа берәүгә ауҙарыу; **переписа́ть дом на сы́на** өйҙө улы исеменә күсереп яҙҙырыу

**3.** *с вин. п.* (*при обозначении места, на которое направлено действие*) -ға/-гә; **верну́ться на ро́дину** тыуған илгә ҡайтыу; **пойти́ на заво́д** заводҡа эшкә барыу

**4.** *с вин. п.* (*в значении "по направлению к"*, *"в сторону"*) -ға/-гә табан, ҡарай, яҡҡа; **идти́ на го́лос** тауыш ишетелгән яҡҡа барыу; **дви́гаться на восто́к** көнсығышҡа табан хәрәкәт итеү; **дверь на у́лицу** ишек урамға табан

**5.** *с вин. п.* (*при обозначении лица, предмета и т.п., с которыми соприкасаются, сталкива-*

*ются в результате движения, действия)* -ға/-гә; **наткну́ться в темноте́ на ка́мень** ҡараңғыла ташҡа барып бәрелеү; **наскочи́ть на забо́р** ҡоймаға барып бәрелеү

**6.** *с вин. п. (при указании срока, времени)* -ға/-гә; **встре́ча назна́чена на за́втрашний день** осрашыу иртәгәһе көнгә билдәләнгән; **запаса́ться на́ зиму** ҡышҡа әҙерләү; **прие́хать на две неде́ли** ике аҙнаға килеү; **на пе́рвый раз** беренсе тапҡырға; **со дня на́ день** бөгөн-иртәгә, яҡын көндәрҙә, тиҙ арала, ошо арала; **с мину́ты на мину́ту (с ча́су на час)** бына хәҙер, хәҙер-хәҙер (тип тороу)

**7.** *с вин. п. (при обозначении цели, к которой направлено действие)* -ға/-гә, өсөн; **отда́ть на воспита́ние** тәрбиәгә биреү; **сдать на хране́ние** һаҡлау өсөн тапшырыу

**8.** *с вин. п. (при обозначении целевого назначения чего-л.)* -лыҡ/-лек; **отре́з на пла́тье** күлдәклек тауар; **ко́мната на пять челове́к** биш кешелек бүлмә

**9.** *с вин. п.; разг. (при обозначении специальности, профессии)* -лыҡҡа/-леккә; **учи́ться на врача́** табиплыҡҡа уҡыу

**10.** *с вин. п. (при указании на характер, образ действия)* -ға/-гә; **на ра́зные голоса́** төрлө тауыштарға; **на но́вый лад** яңыса

**11.** *с вин. п. (при обозначении качества, меры)* -ға/-гә; **бег на сто ме́тров** йөҙ метрға йүгереү

**12.** *с вин. п. (при обозначении предмета, являющегося орудием действия)* -ға/-гә; **закры́ть на замо́к** йоҙаҡҡа бикләү

**13.** *с вин. п. (при указании на количественные изменения в результате какого-л. действия)* -ға/-гә; **пятна́дцать раздели́ть на пять** ун биште бишкә бүлеү; **три умно́жить на три** өстө өскә ҡабатлау

**14.** *с вин. п. (при указании на количественную разницу, степень превосходства или недостатка)* -ға/-гә; **он моло́же своего́ бра́та на пять лет** ул үҙенең ағаһынан биш йәшкә йәшерәк

**15.** *с предл. п. (при обозначении предмета, на поверхности которого протекает действие или находится кто-что-л.)* -да/-дә, өҫтөндә; **сиде́ть на сту́ле** ултырғыста ултырыу; **лежа́ть на дива́не** диванда ятыу

**16.** *с предл. п. (при обозначении лиц, организаций, на которые возложено что-л.)* -да/-дә, өҫтөндә; **вина́ на мне** ғәйеп миндә; **все забо́ты по до́му на ней** бөтә өй мәшәҡәттәре уның өҫтөндә

**17.** *с предл. п. (при обозначении области, сферы, места, пространства, в которых происходит какое-л. действие или проявляется какое-л. свойство)* -да/-дә; **выступа́ть на съе́зде** съезда сығыш яһау; **учи́ться на ку́рсах** курстарҙа уҡыу

**18.** *с предл. п. (при указании на положение, состояние)* -да/-дә (булып тороу); **находи́ться на излече́нии** дауаланыуҙа (булыу); **быть на иждиве́нии бра́та** ағаһы тәрбиәһендә булыу

**19.** *с предл. п. (при обозначении промежутка времени)* -да/-дә; **на той неде́ле** теге аҙнала; **на у́тренней заре́** иртә таңда

**20.** *с предл. п. (при обозначении лиц, предметов, облачённых во что-л.)* өҫтөндә; **на ней бы́ло пальто́** уның өҫтөндә пальто ине

**21.** *с предл. п. (при обозначении орудий действия или средств передвижения)* -да/-дә, менән; **ката́ться на конька́х** конькиҙа шыуыу; **прие́хать на ло́шади** ат менән килеү

**22.** *с предл. п. (при указании на средство, с помощью которого кто-что-л. действует)* -да/-дә, менән; **жа́рить на ма́сле** майҙа ҡыҙҙырыу (майға ҡурыу); **заво́д рабо́тает на не́фти** завод нефть менән эшләй

**23.** *с предл. п. (при обозначении вещества, которое входит в состав чего-л.)* -лы/-ле, эшләнгән, ҡушып (ҡатнаштырып) эшләнгән (әҙерләнгән); **мазь на вазели́не** вазелинлы май; **варе́нье на са́харе** шәкәрҙә әҙерләнгән ҡайнатма ♦ **на лету́** осоп барғанда; **на бегу́** йүгереп барғанда; **на скаку́** сабып барғанда; **на ходу́** барғанда

**НА II** *частица в знач. сказ.; разг.* мә, бына; **на, возьми́** мә, ал; **вот тебе́ и на** бына һиңә кәрәк булһа (*ныҡ аптырау белдергәндә әйтелә*)

**НА...** *приставка* **1.** *ҡылым яһағанда ҡулланыла һәм тәржемәлә түбәндәгеләрҙе аңлата*: а) *бәрелеүҙе, барып тейеүҙе, мәҫ.*, **налете́ть на про́вод** сымға барып бәрелеү; б) *предмет өҫтөнә һалыуҙы, ҡуйыуҙы, мәҫ.*, **накле́ить на сте́ну** стенаға йәбештереп ҡуйыу; в) *предмет өҫтөндә яһалыуҙы, барлыҡҡа килеүҙе, мәҫ.*, **нали́пнуть** (өҫтөнә) йәбешеү; **намёрзнуть** өҫтөнә ҡатыу; г) *хәрәкәттең тулылығын, етерлек (күп) булыуын, мәҫ.*, **набра́ть я́год** етерлек итеп еләк йыйып алыу; **настира́ть белья́** күп итеп кер йыуып ташлау; **настро́ить домо́в** күп итеп йорттар төҙөп ҡуйыу; д) *"-ся" ҡиҫәксәһе менән эш-хәрәкәттең тулы булғанлығын, тамамланғанлығын, мәҫ.*, **наговори́ться** туйғансы һөйләшеү; **наслу́шаться** туйғансы тыңлау; е) *эш-хәрәкәттең ҙур дәрәжәлә булмағанын (йәки тулы булмағанын), мәҫ.*, **напева́ть** аҡрын ғына көйләү; **насви́стывать** аҡрын ғына көйләп һыҙғырыу **2.** *ҡайһы бер ҡылымдарҙың тамамланған төр формаһын яһағанда ҡулланыла, мәҫ.*, **написа́ть** яҙып бөтөрөү; **напеча́тать** баҫтырып сығарыу **3.** *сифат һәм исем яһағанда ҡулланылып, низеңдер өҫтөндә булған нәмәне аңлата, мәҫ.*, **нарука́вник** еңсә; **нагру́дник** түшелдерек; **насте́нный** стенаға эленә торған **4.** *көсәйтеү дәрәжәһе рәүештәрен яһағанда ҡулланыла, мәҫ.*, **на́крепко** үтә ныҡ итеп; **на́строго** үтә ҡаты итеп; **на́сухо** ҡоп-ҡоро итеп, ҡоротҡансы

**НАБА́ВИТЬ** *сов. что, чего* өҫтәү, арттырыу, ҡушыу, күтәреү; **наба́вить це́ну** хаҡын күтәреү; **наба́вить ша́гу** аҙымдарҙы арттырыу

**НАБА́ВКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **наба́вить 2.** өҫтәмә, өҫтәмә хаҡ (аҡса); **за това́р уплати́ть с наба́вкой** тауарға өҫтәмә хаҡ түләү

**НАБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **наба́вить**

**НАБАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **набавля́ть**

**НАБА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* өҫтәмә, өҫтәлмә; **наба́вочная су́мма** өҫтәлмә аҡса

**НАБАЛДА́ШНИК** *м* таяҡ башы (тотҡаһы)

**НАБАЛО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** *прич. от* **набалова́ть 2.** *прил.* иркәләтеүҙән боҙолған, көйһөҙ; **набало́ванная актри́са** көйһөҙ актриса

**НАБАЛОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* иркәләп (иркәләтеп) боҙоу; **набалова́ть ребёнка** баланы иркәләп боҙоу

**НАБАЛОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прост.* (иркәләнеп) боҙолоу; **набалова́ться от безде́лья** эшһеҙлектән боҙолоу **2.** *разг.* туйғансы (танһығы ҡанғансы) шаярыу, шаярып туйыу; **набалова́ться от души́** ысын күңелдән туйғансы шаярыу

**НАБА́ЛТЫВАТЬ I** *несов. см.* **наболта́ть** I

**НАБА́ЛТЫВАТЬ II** *несов. см.* **наболта́ть** II

**НАБАЛЬЗАМИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* бәлзәмләү; **набальзами́ровать труп** мәйет(те) бәлзәмләү

**НАБА́Т** *м* саң, һөрән, оран, һөрән һалыу; **с колоко́льни разда́лся наба́т** ҡыңғыраուҙан саң яңғыраны ♦ **бить (ударя́ть) в наба́т** саң ҡағыу (*һөрән һалыу*)

**НАБА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тревога сигналы ...ы; **наба́тный звон** тревога сигналы сыңлауы **2.** саң ҡағыу ...ы, һөрән һалыу ...ы; **наба́тный ко́локол** саң ҡағыу ҡыңғырауы

**НАБЕ́Г** *м* **1.** барымта, һөжүм, сапҡын, баҫҡын; **соверша́ть набе́г** һөжүм яһау **2.** *перен.* инеү, килеп инеү ♦ **с набе́га (с набе́гу)** йүгереп килеп, йүгереп барғанда, осоп барғанда

**НАБЕГА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **набежа́ть 2.** (*совершать набеги*) һөжүм яһау (итеү), сапҡын яһау

**НАБЕ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*вдоволь побегать*) туйғансы йүгереү, күп йүгереү; **ребёнок набе́гался** бала туйғансы йүгерҙе **2.** (*утомиться от беготни*) йүгереп йөрөп арыу (арып бөтөү); **набе́гаться за́ день** көн буйы йүгереп, арып бөтөү

**НАБЕДОКУ́РИТЬ** *сов.*; *разг.* (шаярып, яңылыш) бәлә тыуҙырыу, зыян килтереү; **ма́льчик си́льно набедоку́рил** малай бик ҙур зыян килтерҙе

**НАБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *на кого-что* (*наскочить с разбега*) йүгереп барып бәрелеү, килеп менеү **2.** *на что* (*быстро надвинувшись, закрыть собой*) ҡаплау, ҡаплап алыу; **на со́лнце набежа́ла ту́ча** ҡояшты болот ҡапланы **3.** *на что* (*выступить, появиться, налиться*) йыйылыу, тулыу; **набежа́ло с ведро́ воды́** бер биҙрәгә яҡын һыу йыйылды; **на глаза́ набежа́ли слёзы** күҙгә йәш тулды **4.** (*о ветре*) кинәт (ҡапыл) иҫеү (иҫеп ебәреү); **ве́тер набежа́л** ҡапыл ел иҫеп ебәрҙе **5.** *разг.* (*сбегаясь, скопиться где-л.*) йыйылыу; **к ве́черу набежа́л наро́д** кискә табан халыҡ йыйылып китте **6.** *перен.*, *разг.* (*о деньгах*) йыйылыу, артыу, үҫеү; **набежа́ли проце́нты** проценттары артҡан (үҫкән)

**НАБЕЗОБРА́ЗНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* тәртип боҙоп ташлау, (төрлө) әшәкелектәр эшләү, насарлыҡ ҡылыу

**НАБЕКРЕ́НЬ** *нареч.* ҡырын, ҡырын һалып; **наде́ть ша́пку набекре́нь** бүректе ҡырын һалып кейеү

**НАБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** кершән яғыу, пудра һөртөү; **набели́ть лицо́** биткә пудра һөртөү **2.** (*побелить*) ағартыу, аҡлау; **набели́ть сте́ны** стеналарҙы аҡлау **3.** (*отбелить*) ағартыу; **набели́ть холсто́в** киндер ағартыу

**НАБЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* пудра (кершән) һөртөнөү

**НА́БЕЛО** и **НАБЕЛО́** *нареч.* аҡҡа, таҙаға; **переписа́ть на́бело** аҡҡа күсереп яҙыу

**НА́БЕРЕЖНАЯ** *ж* **1.** (*берег*) менән нығытылған яр; **грани́тная на́бережная** гранит менән нығытылған яр **2.** (*улица вдоль берега*) яр буйы урамы; **прое́хать по на́бережной** яр буйы урамынан үтеп китеү

**НАБИВА́ТЬ** *несов. см.* **наби́ть**

**НАБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наби́ться 2.** *страд. от* **набива́ть**

**НАБИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **наби́ть** 1, 2, 4, 6; **наби́вка тка́ни** туҡыманы биҙәкләү **2.** *разг.* (*то, чем набито что-л.*) тултыра торған нәмә; **ва́тная наби́вка матра́ца** матрац эсенә тултыра торған мамыҡ

**НАБИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** тултырылған; **набивно́й матра́ц** тултырылған матрац **2.** биҙәкле, биҙәк баҫылған (төшөрөлгән); **набивно́й шёлк** биҙәкле ебәк **3.** биҙәкләй торған, биҙәк баҫа (төшөрә) торған; **набивна́я маши́на** биҙәк баҫа торған машина

**НАБИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое биҙәк баҫа (төшөрә) торған, биҙәк баҫыу (төшөрөү) өсөн, биҙәкләү өсөн; **наби́вочная маши́на** биҙәк баҫыу өсөн машина; **наби́вочный материа́л** биҙәкләү өсөн туҡыма

**НАБИРА́ТЬ** *несов. см.* **набра́ть**

**НАБИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **набра́ться 2.** *страд. от* **набира́ть**

**НАБИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тултырыу, тыңҡыслап (төйгөсләп, тығыҙлап) тултырыу, баҫып тултырыу; **наби́ть поду́шку пу́хом** мендәргә мамыҡ тултырыу; **наби́ть в тру́бку таба́ку** төрөпкәгә тәмәке тултырыу **2.** (*приколотить к поверхности чего-л.*) ҡағып ҡуйыу; **наби́ть на дверь вы́веску** ишеккә вывеска ҡағып

ҡуйыу **3.** (*вколотить*) ҡағыу; **наби́ть гвозде́й** сөй ҡағыу **4.** (*надеть*) һуғыу, кейҙереү; **наби́ть о́бручи на ка́дку** сапсаҡҡа ҡоршау һуғыу **5.** *разг.* (*ударами, трением и т.п. вызвать болезненное явление*) бәреп шештереү, ҡабартыу, ҡырҙырыу; **наби́ть ши́шку на лбу** маңлайҙы бәреп шештереү; **наби́ть мозо́ли на ладо́нях** устарҙы ҡабартыу **6.** *тех.* (*отпечатать узор*) биҙәк төшөрөү, биҙәк баҫыу **7.** *что, кого-чего*; *разг.* (*настрелять*) байтаҡ атып алыу (*бер ни тиклем*); **наби́ть у́ток** байтаҡ өйрәк атып алыу **8.** *что, чего* (*разбить*) ватыу, ярыу; **наби́ть посу́ды** һауыт-һаба ватыу ♦ **наби́ть карма́н (мошну́)** кеҫә ҡалынайтыу, байыу; **наби́ть оско́мину**: 1) теш ҡамаштырыу; 2) теңкәгә тейеү; **наби́ть ру́ку** оҫтарып китеү (алыу), таҫылланып алыу; **наби́ть це́ну** *на что* хаҡ күтәреү (*ниндәй ҙә булһа тауарға*); **наби́ть себе́ це́ну** үҙ дәрәжәңде күтәрергә тырышыу

**НАБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тулыу, шығырым тулыу; **в ко́мнату наби́лось мно́го наро́ду** бүлмәгә халыҡ шығырым тулды **2.** (*навязаться*) тағылыу, көсләп тағылыу, тырышыу; **наби́ться в друзья́** дуҫ булырға тырышыу ♦ **наби́ться битко́м** шығырым тулыу

**НАБЛЮДА́ТЕЛЬ** *м* күҙәтсе, күҙәтеүсе, күҙәтеп (ҡарап) тороусы; **вое́нный наблюда́тель** хәрби күҙәтеүсе

**НАБЛЮДА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* күҙәтеүсәнлек; **име́ть дар наблюда́тельности** күҙәтеүсәнлек һәләтенә эйә булыу

**НАБЛЮДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күҙәтеүсән, оҫҡор күҙле, иғтибарлы, һынсыл; **наблюда́тельный челове́к** күҙәтеүсән кеше **2.** күҙәтеү ...ы; **наблюда́тельный пункт** күҙәтеү пункты

**НАБЛЮДА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что, за кем-чем* (*следить глазами*) күҙәтеү, күҙәтеп (ҡарап) тороу; **наблюда́ть зака́т со́лнца** ҡояш байығанды күҙәтеү **2.** *кого-что* (*изучать, исследовать*) күҙәтеү, өйрәнеп (тикшереп) тороу; **наблюда́ть жизнь живо́тных** хайуандар тормошон күҙәтеү **3.** *за кем-чем* (*присматривать*) күҙ-ҡолаҡ булыу, ҡарау, күҙәтеү; **наблюда́ть за детьми́** балаларға күҙ-ҡолаҡ булыу

**НАБЛЮДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*встречаться, бывать, случаться*) осрау, осраштырғылау, булғылау, күҙәтелеү, һиҙелеү; **наблюда́ются оши́бки** хаталар осраштырғылай; **наблюда́ется потепле́ние пого́ды** көндәрҙең йылыныуы күҙәтелә **2.** *страд. от* **наблюда́ть** 2

**НАБЛЮДЕ́НИЕ** *с см.* **наблюда́ть**; **вести́ наблюде́ние** күҙәтеү алып барыу; **под наблюде́нием врача́** врач күҙәтеүендә

**НАБО́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **набо́йка** 1

**НА́БОЖНОСТЬ** *ж* динселлек, диндарлыҡ, тәҡүәлек; **отлича́ться на́божностью** динселлек менән айырылып тороу

**НА́БОЖНЫЙ,** -ая, -ое динсел, диндар, тәҡүәле; **на́божный стари́к** тәҡүәле ҡарт; **на́божное настрое́ние** динсел (кешегә хас) кәйеф

**НАБО́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **наби́ть** 4; **набо́йка обруче́й на бо́чку** мискәгә ҡоршау һуғыу **2.** (*ткань с набивным узором*) биҙәк, биҙәкле туҡыма, биҙәк төшөрөлгән туҡыма; **ска́терть из набо́йки** биҙәк төшөрөлгән ашъяулыҡ **3.** (*на обуви*) набойка; **рези́новые набо́йки** резина набойкалар

**НАБО́ЙЩИК** *м* **1.** (*рабочий*) тултырыусы; **набо́йщик папиро́с** папирос тултырыусы **2.** (*рабочий-текстильщик*) биҙәкләүсе, биҙәк баҫыусы (*ир-ат*)

**НАБО́ЙЩИЦА** *ж* биҙәк баҫыусы (*ҡатын-ҡыҙ*)

**НА́БОК** *нареч.* ҡырын, бер яҡҡа; **шля́па сби́лась на́бок** эшләпә ҡырын киткән; **склони́ть го́лову на́бок** башты бер яҡҡа эйеү

**НАБОЛЕ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **наболе́ть 2.** *прил.* күптән борсоған (борсоп торған), күптән хәл ителергә тейешле, кисектергеһеҙ; **наболе́вший вопро́с** күптән борсоған мәсьәлә

**НАБОЛЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (бик ҡаты, ныҡ) ауырта (һыҙлай) башлау; **от нары́ва наболе́ла рука́** эренләүҙән ҡул бик ҡаты һыҙлай башланы **2.** *перен.* (*накопиться — о чём-л. мучительном*) йыйылыу, тулыу, әрнеү; **наболе́ло на душе́** *безл.* йөрәк (йән, күңел) әрней

**НАБОЛТА́ТЬ I** *сов. что, чего*; *разг.* (*взболтать*) болғап (ҡушып) туҡыу; **наболта́ть яи́ц в молоке́** йомортҡаны һөткә ҡушып туҡыу

**НАБОЛТА́ТЬ II** *сов. что, чего*; *разг.* күп лығырлау, юҡ-бар (артығын) һөйләп ташлау

**НАБОЛТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы һөйләшеү, һөйләшеп туйыу, ләстит һатыу; **наболта́ться за ве́чер** кис буйы туйғансы һөйләшеү

**НАБО́Р** *м* **1.** *см.* **набра́ть**; **набо́р воды́ в бак** бакка һыу йыйыу **2.** йыйылма; **набо́р слеса́рных инструме́нтов** слесарлыҡ ҡоралдары йыйылмаһы **3.** *типогр.* набор, йыйылған хәрефтәр **4.** (*металлическое украшение на ремне, упряжи*) еҙле, көмөшлө ♦ **набо́р слов** һүҙ буткаһы, мәғәнәһеҙ һүҙҙәр

**НАБО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *типогр.* набор ...ы, хәреф йыйыу ...ы; **набо́рная маши́на** хәреф йыйыу машинаһы **2.** *в знач. сущ.* **набо́рная** *ж* типографияла хәреф йыйыу бүлеге **3.** еҙле, еҙ (көмөш) тағылған; **набо́рная шлея́** еҙле (көмөшлө) ышлыя

**НАБО́РЩИК** *м* и **НАБО́РЩИЦА** *ж* хәреф йыйыусы

**НАБО́РЩИЦКИЙ,** -ая, -ое хәреф йыйыусы ...ы; **набо́рщицкое ремесло́** хәреф йыйыусы һөнәре

**НАБРАНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы әрләшеү; **успе́ть набрани́ться** туйғансы әрләшеп өлгөрөү

**НАБРА́СЫВАТЬ I** *несов. см.* **наброса́ть**

**НАБРА́СЫВАТЬ II** *несов. см.* **набро́сить**

**НАБРА́СЫВАТЬСЯ I** *несов. см.* **набро́ситься**

**НАБРА́СЫВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **набра́сывать** II

**НАБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, чего* (*собрать*) йыйыу, алыу, туплау (*етерлек итеп*); **набра́ть корзи́ну я́год** бер кәрзин еләк йыйыу; **набра́ть о́пыт рабо́ты** эш тәжрибәһе туплау **2.** *что, кого-чего* (*принять, нанять*) алыу, ҡабул итеү; **набра́ть рабо́чих на заво́д** заводҡа эшселәр алыу **3.** *что; перен.* (*достичь нужной степени*) ирешеү, үҫтереү, шәбәйтеү; **набра́ть те́мпы в рабо́те** эштә темпты шәбәйтеү **4.** *что* (*составить*) йыйыу; **набра́ть но́мер телефо́на** телефон номерын йыйыу; **набра́ть статью́ пети́том** мәҡәләне петит менән йыйыу ♦ **набра́ть воды́ в рот** *прост.* ауыҙға һыу уртлау, ауыҙ йомоу, ләм-мим өндәшмәү

**НАБРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*скопиться*) йыйылыу; **в я́му набрала́сь вода́** соҡорға һыу йыйылған **2.** *чего* (*усвоить*) үҙләштереү, өйрәнеү; **набра́ться но́вых пра́вил** яңы ҡағиҙәләрҙе үҙләштереү **3.** *чего* йыйыу, туплау; **набра́ться о́пыта** тәжрибә туплау ♦ **набра́ться ду́ху** нимәгә булһа ла баҙнат итеү, ҡыйыулыҡ туплау; **набра́ться сил** көс йыйыу (туплау); **набра́ться ума́ (ра́зума)** аҡыл йыйыу, аҡылға ултырыу

**НАБРЕДА́ТЬ** *несов. см.* **набрести́**

**НАБРЕСТИ́** *сов.* **1.** *на кого-что; прям., перен.* барып (килеп) сығыу, килеү, төшөү, юлығыу, тап булыу; **набрести́ на след** эҙенә барып сығыу; **набрести́ на мысль о побе́ге** ҡасыу тураһындағы уйға килеү **2.** *обычно безл.* йыйылыу; **набрело́ нема́ло люде́й** байтаҡ кеше йыйылған

**НАБРОДИ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* туйғансы (арығансы) йөрөү; **наброди́ться по у́лицам го́рода** ҡала урамдары буйлап арығансы йөрөү

**НАБРОСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*накидать*) күп итеп (өйгөләп) ташлау, ташлап бөтөү; **наброса́ть оку́рков** күп итеп тәмәке төпсөктәре ташлау **2.** *что* (*нарисовать, написать, изложить и т.п. в общих чертах*) өҫтән-өҫтән генә яҙғылау, ашығыс рәүештә (тиҙ-тиҙ генә) яҙып (һыҙып) ташлау, һыҙғылау; **наброса́ть мы́сли на бума́ге** фекерҙе тиҙ-тиҙ генә яҙып ташлау; **наброса́ть портре́т писа́теля** яҙыусының портретын тиҙ-тиҙ генә һыҙғылау

**НАБРО́СИТЬ** *сов. что* ябыу, һалыу; **набро́сить на хлеб брезе́нт** ашлыҡты брезент менән ябыу

**НАБРО́СИТЬСЯ** *сов.* **1.** *на кого-что* (*напасть*) (өҫтөнә) ташланыу, ырғыу; **соба́ка набро́силась на незнако́мца** эт ят кешегә ташланды **2.** *на что; разг.* (*с жадностью приняться за что-л.*) ҡомһоҙланып тотоноу (керешеү), янып (ашҡынып) тотоноу (керешеү); **набро́ситься на рабо́ту** ашҡынып эшкә тотоноу **3.** *разг.* (*накинуться с бранью, упрёками и т.п.*) шелтәләй (әрләй, һүгә) башлау; **набро́ситься на ребёнка** баланы шелтәләй башлау

**НАБРО́СОК** *м* һыҙма, ҡаралама; **набро́сок рома́на** романдың ҡараламаһы; **набро́сок карти́ны** һүрәт һыҙмаһы, һыҙма һүрәт

**НАБРЫ́ЗГАТЬ** *сов. что, чего* и *без доп.* сәсрәтеү, сәсрәтеп бөтөрөү, һирпеү, һибеү, бөркөү; **набры́згать воды́ на́ пол** иҙәнгә һыу бөркөү

**НАБРЫ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **набры́згать**

**НАБРЮ́ШНИК** *м* бауырлыҡ, көйәк (*йылылыҡ һ.б. өсөн*); **ва́тный набрю́шник** мамыҡ(тан тегелгән) бауырлыҡ

**НАБРЮ́ШНЫЙ,** -ая, -ое эс(тәге), эскә (ҡорһаҡҡа) ҡуйыла торған; **набрю́шный жирово́й слой** *анат.* эс майы, ҡаҙы

**НАБРЯ́КНУТЬ** *сов.; разг.* **1.** еүешләнеп (дымланып, һыу һеңеп) ҡабарыу, күбеү, бүртеү, шешенеү; **дверь набря́кла от вла́ги** еүешлектән ишек шешенгән **2.** шешеү, шешенеү; **у него́ набря́кли ве́ки** уның күҙ ҡабаҡтары шешенгән

**НАБУХА́НИЕ** *с см.* **набуха́ть**; **набуха́ние по́чек** бөрөләрҙең тулышыуы

**НАБУХА́ТЬ** *несов. см.* **набу́хнуть**

**НАБУ́ХНУТЬ** *сов.* **1.** күбеү, күбенеү, бүртеү, бүртенеү, тиртеү, тулышыу; **по́чки набу́хли со́ками** бөрөләр һутҡа тулышҡан **2.** шешеү, шешенеү; **ве́ки набу́хли от слёз** илауҙан күҙ ҡабаҡтары шешенгән; **от дожде́й набу́хли ра́мы** ямғырҙан рамдар шешенгән

**НАВА́ГА** *ж* навага (*балыҡ*)

**НАВАЖДЕ́НИЕ** *с* вәсүәсә, ҡотҡо; **дья́вольское наважде́ние** иблис ҡотҡоһо

**НАВА́ЖИЙ,** -ья, -ье навага тотоу ...ы, навага ...ы; **нава́жий про́мысел** навага тотоу кәсебе; **нава́жья уха́** навага һурпаһы

**НАВА́Л** *м* **1.** *см.* **навали́ть** 1, 2 и **навали́ться 2.** өйөм; **нава́л строи́тельного му́сора** төҙөлөштән ҡалған сүп-сар өйөмө

**НАВА́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **навали́ть**

**НАВА́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **наваля́ть**

**НАВА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **навали́ться 2.** *страд. от* **нава́ливать** I

**НАВА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **нава́ливать** II

**НАВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, на кого-что* йөкмәтеү, өҫтөнә һалыу (тейәү, өйөү, йығыу, ауҙарыу); **навали́ть мешо́к на теле́гу** тоҡто арбаға һалыу; **всю отве́тственность навали́ли на него́** бөтә яуаплылыҡты уға йөкмәттеләр **2.** *что, чего* (*положить в беспорядке*) нисек етте шулай (теләһә нисек) ауҙарыу (һалыу, тейәү, өйөү); **навали́ть дров** утынды теләһә нисек ауҙарыу **3.** *обычно безл.; разг.* (*нагнать, надуть в большом количестве*) күп итеп яуыу; **навали́ло мно́го сне́гу** бик күп итеп ҡар яуған **4.** *обычно безл.; разг.* (*собраться в большом количестве*) бик күп йыйылыу; **навали́ло мно́го наро́ду** бик күп халыҡ йыйылған

**НАВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*налечь*) терәлеп (һөйәлеп, ауырлығын һалып) этеү (баҫыу, ятыу); **изо всей си́лы навали́ться плечо́м** иңбаш менән бөтә көскә этеү **2.** *перен.* өҫкә төшөү; **на меня́ навали́лись все забо́ты** бөтә мәшәҡәттәр минең өҫкә төштө **3.** *перен., разг.* (*внезапно напасть*) (көтмәгәндә) ташланыу, ябырылыу, һөжүм итеү; **навали́ться на врага́** көтмәгәндә дошманға ташланыу

**НАВА́ЛКА** *ж см.* **навали́ть** 1; **нава́лка брёвен** бүрәнә тейәү

**НАВА́ЛОМ** *нареч.* **1.** *разг.* (*в беспорядке*) нисек етте шулай, теләһә нисек; **ве́щи лежа́т нава́лом** әйберҙәр теләһә нисек аунап ята **2.** *в знач. сказ.*; *прост.* (*в избытке*) бик күп, артығы менән; **фру́ктов там нава́лом** емеш-еләк унда бик күп

**НАВАЛООТБО́ЙКА** *ж*; *горн.* күмер ватыу һәм уны забойҙағы конвейерға тейәү

**НАВАЛООТБО́ЙЩИК** *м*; *горн.* навалоотбойщик (*тау эшсеһе*)

**НАВА́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое ауҙарып тейәй торған; **нава́лочная маши́на** ауҙарып тейәй торған машина

**НАВАЛЯ́ТЬ** *сов. что, чего* (бер аҙ, әҙерәк) баҫыу, баҫып ташлау; **наваля́ть не́сколько пар ва́ленок** бер нисә пар быйма баҫыу

**НАВАЛЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы аунау; **наваля́ться на песке́** ҡомлоҡта туйғансы аунау

**НАВА́Р** *м* **1.** (*настой*) сығыш, төнәтмә; **арома́тный нава́р** хуш еҫле төнәтмә **2.** (*жир на поверхности жидкой пищи*) һөҙлөк, тоҙлоҡ; **нава́р на мясно́м бульо́не** ит һурпаһындағы һөҙлөк

**НАВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **навари́ть**

**НАВА́РИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нава́ривать**

**НАВА́РИСТЫЙ,** -ая, -ое өрөлө, һөҙлөклө; **нава́ристая уха́** өрөлө балыҡ һурпаһы

**НАВАРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* күп итеп бешереү (ҡайнатыу); **навари́ть мя́са** күп итеп ит бешереү; **навари́ть варе́нья** күп итеп ҡайнатма ҡайнатыу **2.** *чего*; *тех.* иретеү, иретеп әҙерләү (*бер ни тиклем*); **навари́ть ста́ли** ҡорос иретеү **3.** *что* (*приварить*) ҡыҙҙырып йәбештереү (ялғау); **навари́ть топо́р** балтаны ҡыҙҙырып йәбештереү

**НАВА́РКА** *ж*; *тех.* **1.** *см.* **навари́ть** 3; **изгото́вить нава́ркой** ҡыҙҙырып йәбештереү **2.** ҡыҙҙырып йәбештерелгән өлөш (киҫәк); **нава́рка на косе́** салғының ҡыҙҙырып йәбештерелгән өлөшө

**НАВАРНО́Й,** -ая, -ое *тех.* ҡыҙҙырып йәбештерелгән; **наварно́й коне́ц серпа́** ураҡтың ҡыҙҙырып йәбештерелгән осо

**НАВЕВА́ТЬ** *несов. см.* **наве́ять** 1, 2

**НАВЕВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **навева́ть**

**НАВЕ́ДАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* хәл белергә инеү (килеү, инеп сығыу); **прийти́ наве́даться к больно́му** ауырыуҙың хәлен белергә килеү

**НАВЕДЕ́НИЕ** *с см.* **навести́** 3—6; **наведе́ние поря́дка** тәртип урынлаштырыу; **наведе́ние моста́** күпер һалыу

**НАВЕ́ДЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **наве́даться**

**НАВЕЗТИ́** *сов. кого-что, чего* (күп итеп) килтереп (ташып) ҡуйыу, килтереп тултырыу; **навезти́ това́ров** тауар килтереп тултырыу

**НАВЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **наве́ять** 3

**НАВЕ́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наве́ивать**

**НАВЕ́К** и **НАВЕ́КИ** *нареч.* мәңгегә, мәңгелеккә, ғүмергә, ғүмерлеккә, бөтөнләйгә; **прости́ться наве́ки** мәңгелеккә хушлашыу; **наве́ки вме́сте** мәңгегә бергә

**НАВЕРБОВА́ТЬ** *сов. кого-что* йыйып алыу, туплау, яллау; **навербова́ть рабо́чих для но́вой стро́йки** яңы төҙөлөшкә эшселәр туплау

**НАВЕРБО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **навербо́вывать**

**НАВЕРБО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **навербова́ть**

**НАВЕ́РНО** и **НАВЕ́РНОЕ** *нареч. в знач. вводн. сл.* моғайын, күрәһең, -дыр/-дер; **он, наве́рно, по́мнит о на́шем разгово́ре** ул, моғайын, беҙҙең һөйләшеүҙе онотмағандыр

**НАВЕРНУ́ТЬ** *сов.* **1.** (*намотать*) урау, урап ҡуйыу; **наверну́ть на па́лец ма́рлю** бармаҡҡа марля урау **2.** (*навинтить, надеть*) бороу, бороп кейҙереү (ҡуйыу, кертеү, индереү); **наверну́ть га́йку** гайканы бороп индереү

**НАВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** уралыу, йәбешеү; **верёвка наверну́лась на вал** арҡан валға уралған **2.** боролоп кереү, бороп кейҙереү; **га́йка наверну́лась на болт** гайка болтҡа бороп кейҙерелде **3.** йәш тулыу, йәшләнеү; **на глаза́ наверну́лись слёзы** күҙгә йәш тулды

**НАВЕРНЯКА́** *нареч.*; *разг.* **1.** әлбиттә, мотлаҡ, моғайын, һис шикһеҙ; **об э́том никто́ не зна́ет наверняка́** был турала, әлбиттә, бер кем дә белмәй **2.** яңылышмай(ынса), ныҡ ышанып, ныҡлы ышаныс менән; **де́йствовать наверняка́** ныҡ ышанып эш итеү

**НАВЕРСТА́ТЬ I** *сов. что* тултырыу, ҡаплау, ҡыуып етеү, эшләп бөтөрөү; **наверста́ть упу́щенное** эшләнмәй ҡалғанды эшләп бөтөрөү

**НАВЕРСТА́ТЬ II** *сов. что, чего*; *типогр.* вёрсткалау, вёрсткалап ҡуйыу; **наверста́ть не́сколько страни́ц кни́ги** китаптың бер нисә битен вёрсткалау

**НАВЁРСТЫВАТЬ I** *несов. см.* **наверста́ть** I

**НАВЁРСТЫВАТЬ II** *несов. см.* **наверста́ть** II

**НАВЁРСТЫВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **навёрстывать** I

**НАВЁРСТЫВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **навёрстывать** II

**НАВЕРТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*намотать*) урау, урап ҡуйыу; **наверте́ть коне́ц верёвки на́ руку** бауҙың осон ҡулға урау **2.** *что, чего* бороп (быраулап) тишеү; **наверте́ть отве́рстий** бороп тишек(тәр) тишеү

**НАВЁРТКА** *ж см.* **наверте́ть** 1, **наверну́ть** 2; **навёртка га́ек** гайкаларҙы бороп кейҙереү

**НАВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **наверну́ть** 1, 2 и **наверте́ть** 1

**НАВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наверну́ться 2.** *страд. от* **навёртывать**

**НАВЕ́РХ** *нареч.*; *в разн. знач.* үргә, өҫкә, юғарыға; **вы́браться наве́рх** өҫкә сығыу; **подня́ться по тропе́ наве́рх** һуҡмаҡ буйлап үргә менеү; **подня́ться по ступе́нькам наве́рх** баҫҡыстан өҫкә менеү; **взгляну́ть наве́рх** юғарыға ҡарау

**НАВЕРХУ́** *нареч.*; *в разн. знач.* юғарыла, өҫтә, үрҙә; **наверху́ послы́шался шум** өҫтә тауыш ишетелде

**НАВЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **наверте́ть** 2

**НАВЕ́РЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наве́рчивать**

**НАВЕ́С** *м* лапаҫ, япма, түбә(лек), әүеҫлек; **быть под наве́сом** лапаҫ аҫтында булыу; **наве́с над гумно́м** ырҙын табағы япмаһы; **наве́с над коло́дцем** ҡоҙоҡ түбәһе

**НАВЕСЕЛЕ́** *нареч.*; *разг.* ҡыҙмаса (*аҙ ғына иҫерек*); **быть навеселе́** ҡыҙмаса булыу

**НАВЕ́СИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* сығынҡы; **наве́систый бе́рег** сығынҡы яр

**НАВЕ́СИТЬ** *сов.* **1.** (*повесить*) элеү, (элеп) ҡуйыу; **наве́сить на дверь замо́к** ишеккә йоҙаҡ элеп ҡуйыу; **наве́сить мно́го белья́** күп итеп кер элеү **2.** (*надеть на петли*) ҡуйыу; **наве́сить дверь** ишек ҡуйыу **3.** *что*, *чего*; *разг.* тағыу, эләктереү, бәйләү

**НАВЕ́СКА** *ж* **1.** *см.* **наве́сить** 1, 2; **наве́ска проводо́в** сым һуҙыу (тартыу) **2.** (*петля*) күгән; **желе́зная наве́ска** тимер күгән

**НАВЕСНО́Й,** -ая, -ое аҫма(лы), элмә(ле); **навесно́й замо́к** аҫмалы йоҙаҡ

**НАВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** лапаҫ ...ы, түбә ...ы, япма ...ы **2.** *см.* **навесно́й**

**НАВЕСТИ́** *сов.* **1.** *на что* йүнәлтеү, төшөрөү; **навести́ на след** эҙгә төшөрөү **2.** *на что*; *перен.* йүнәлтеү, тыуҙырыу; **навести́ на мысль** фекер тыуҙырыу **3.** *что* төбәү, тоҫҡау, йүнәлтеү; **навести́ бино́кль** биноклде йүнәлтеү **4.** *что* һалыу, эшләү, төҙөү; **навести́ мост** күпер һалыу **5.** (*покрыть, окрасить*) буяу, ҡаплау, һөртөп (йөрөтөп) сығыу, өҫтөнән йүгертеү; **навести́ на кра́ску лак** буяу өҫтөнән лак һөртөп сығыу **6.** *что*; *перен.*, *разг.* урынлаштырыу; **навести́ поря́док** тәртип урынлаштырыу **7.** *кого-что*; *разг.* килтереп тултырыу; **навести́ в дом госте́й** өйгә ҡунаҡтар килтереп тултырыу ♦ **навести́ кри́тику** *на кого-что* тәнҡитләү; **навести́ спра́вку** *о ком-чём* белеү, һорашып белеү, һорашыу; **навести́ страх** ҡурҡытыу, ҡотон осороу; **навести́ тень (на плете́нь, на я́сный день)** томан ебәреү, төтөн осороу; **навести́ тоску́** *на кого-что* эсен бошороу; **навести́ на ум (ра́зум)** аҡылға өйрәтеү (ултыртыу)

**НАВЕСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* хәл белергә инеп сығыу, хәл белеп сығыу; **навести́ть больно́го** ауырыуҙың хәлен белеп сығыу

**НАВЕ́ТРЕННЫЙ,** -ая, -ое елгә ҡаршы (яҡ), ел иҫкән яҡтағы; **наве́тренный борт корабля́** караптың елгә ҡаршы борты

**НАВЕ́ЧНО** *нареч.* мәңгегә, мәңгелеккә, ғүмергә, ғүмерлеккә; **полюби́ть наве́чно** ғүмерлеккә яратыу

**НАВЕ́ШАТЬ I** *сов. что*, *чего* (*повесить*) күп итеп (күпләп) элеп ҡуйыу; **наве́шать мно́го белья́** күп итеп кер элеү

**НАВЕ́ШАТЬ II** *сов. что*, *чего* (*взвешивая, приготовить*) үлсәп ҡуйыу (*күпмелер*); **наве́шать не́сколько паке́тов са́хару** бер нисә төргәк шәкәр үлсәп ҡуйыу

**НАВЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **наве́сить**, **наве́шать** I

**НАВЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **наве́шать** II

**НАВЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **навести́ть**

**НАВЕ́ЯТЬ** *сов.* **1.** *что* иҫеп (өрөп) алып килеү, иҫеп (өрөп) килтереү; **ве́тер наве́ял прохла́ду** ел һалҡынса һауа килтерҙе **2.** *безл.* иҫте; **наве́яло све́жесть** һалҡынса ел иҫте; еләҫ булып китте **3.** *что*; *перен.* (*вызвать какое-л. состояние, настроение и т.п.*) тыуҙырыу, килтереү; **пе́сня наве́яла тоску́** йыр һағыш тыуҙырҙы **4.** *с.-х.* (күпмелер) елгәреү, елгәреп ҡуйыу, таҙартыу; **наве́ять мно́го пшени́цы** күп итеп бойҙай елгәреү (таҙартыу)

**НА́ВЗНИЧЬ** *нареч.* салҡан, салҡатан; **лежа́ть на́взничь** салҡан ятыу; **упа́сть на́взничь** салҡан барып төшөү

**НАВЗРЫ́Д: пла́кать навзры́д** үкереп (үкһеп) илау

**НАВИВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое урау (ишеү) өсөн, урау (ишеү) ...ы; **навива́льный стано́к** урау станогы

**НАВИВА́ТЬ** *несов. см.* **нави́ть**

**НАВИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нави́ться 2.** *страд. от* **навива́ть**

**НАВИГА́ТОР** *м* навигатор (*навигация белгесе*)

**НАВИГАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое навигация ...ы; **навигацио́нный пери́од** навигация осоро; **навигацио́нные прибо́ры** навигация приборҙары

**НАВИГА́ЦИЯ** *ж* навигация (**1.** *теплоходтар, караптар йөрөшө* **2.** *теплоходтар, караптар йөрөү миҙгеле* **3.** *караптар йөрөтөү ҡағиҙәләрен өйрәнеүсе фән бүлеге*); **откры́тие навига́ции** навигация асыу; **уче́бник по навига́ции** навигация буйынса дәреслек

**НАВИДА́ТЬСЯ** и **НАВИ́ДЕТЬСЯ** *сов. чего*; *разг.* күпте күреү, баштан кисереү; **всего́ навида́ться** күп нәмә күреү; **навида́ться чуде́с** күп мөғжизәләр күреү

**НАВИ́ЛЬНИК** *м* **1.** киң йәпле ҙур һәнәк **2.** бер һәнәк (бесән, һалам һ.б.); **нави́льник се́на** бер һәнәк бесән

**НАВИНТИ́ТЬ** *сов. что* бороу, бороп ҡуйыу (индереү, кейҙереү); **навинти́ть га́йку** гайканы бороп ҡуйыу

**НАВИНТИ́ТЬСЯ** *сов.* бороп ҡуйылыу (кейҙерелеү, индерелеү); **га́йка навинти́лась легко́** гайка еңел генә бороп ҡуйылды

**НАВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **навинти́ть**

**НАВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **навинти́ться 2.** *страд. от* **нави́нчивать**

**НАВИРА́ТЬ** *несов. см.* **навра́ть**

**НАВИРА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **навира́ть**

**НАВИСА́ТЬ** *несов. см.* **нави́снуть**

**НАВИ́СЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һалынҡы, һалынып торған; **нави́слые бро́ви** һалынҡы ҡаш

**НАВИ́СНУТЬ** *сов.* **1.** *на что* һалынып төшөү (тороу), аҫылынып тороу (төшөү), йәбешеү, йәбешеп тороу; **во́лосы нави́сли на лоб** сәстәр маңлайға һалынып төшкән; **на ресни́цы нави́сла снежи́нка** керпектәргә ҡар бөртөгө йәбешкән **2.** *над кем-чем*; *перен.* килеп тыуыу, килеп баҫыу; **над пу́тниками нави́сла опа́сность** юлсылар алдында ҡурҡыныс килеп тыуҙы

**НАВИ́СШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **нави́снуть**; **нави́сшая опа́сность** килеп тыуған хәүеф **2.** *прил.* һалынҡы, һалынып төшкән; **нави́сший бе́рег** һалынҡы яр

**НАВИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** сырмау, урау, сырмап (урап) ҡуйыу; **нави́ть ни́ток** еп урау **2.** ишеү, үреү, ишеп (үреп) ҡуйыу (*бер ни тиклем*); **нави́ть кана́тов** арҡандар ишеп ҡуйыу

**НАВИ́ТЬСЯ** *сов.* уралыу, сырмалыу; **ни́тки неро́вно нави́лись на кату́шку** еп кәтүккә тигеҙ уралмаған

**НАВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **навле́чь**

**НАВЛЕ́ЧЬ** *сов. что* тыуҙырыу, килтереү, сығарыу; **навле́чь беду́** бәлә килтереү; **навле́чь на себя́ подозре́ние** үҙеңә ҡарата шик тыуҙырыу

**НАВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **навести́**

**НАВОДИ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **наводи́ть**

**НАВО́ДКА** *ж см.* **навести́** 3—5; **наво́дка моста́** күпер һалыу; **наво́дка ору́дий** туптарҙы төҙәү

**НАВОДНЕ́НИЕ** *с* **1.** һыу баҫыу; **борьба́ с наводне́нием** һыу баҫыуға ҡаршы көрәш **2.** *см.* **наводни́ть** 2 — **наводня́ть**; **наводне́ние ры́нка това́рами** баҙарҙы тауар менән тултырыу

**НАВОДНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** һыу баҫыу; **весно́й наводни́ло низи́ны** яҙын уйпат ерҙәрҙе һыу баҫты **2.** *кем-чем*; *перен.* күмеү, тултырыу, килтереп тултырыу; **наводни́ть ры́нок овоща́ми** йәшелсә менән баҙарҙы тултырыу **3.** тулыу, баҫыу; **тури́сты наводни́ли го́род** ҡалаға туристар килеп тулған

**НАВОДНИ́ТЬСЯ** *сов. кем-чем*; *перен.* тулыу; **пло́щадь наводни́лась вса́дниками** майҙан һыбайлылар менән тулған

**НАВОДНО́Й: наводно́й мост** һүтелмәле күпер (*ваҡытлыса файҙаланыу өсөн төҙөлгән*)

**НАВОДНЯ́ТЬ** *несов. см.* **наводни́ть**

**НАВОДНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наводни́ться 2.** *страд. от* **наводня́ть**

**НАВО́ДЧИК** *м* **1.** (*боец*) төҙәүсе, тоҫҡаусы, күҙәтеүсе (*яугир*) **2.** (*рабочий*) төҙөүсе, һалыусы, көмөш йүгертеүсе (ялатыусы); **наво́дчик зерка́л** көҙгөгә көмөш йүгертеүсе; **наво́дчик мосто́в** күпер төҙөүсе **3.** (*вор*) йүнәлтеүсе, тоҫҡаусы; **наво́дчик у воровско́й ша́йки** ҡараҡтар шайкаһын йүнәлтеүсе

**НАВО́ДЧИЦА** *ж см.* **наво́дчик** 2, 3

**НАВОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **наводи́ть 2.** *прил.* ярҙамсы; **наводя́щий вопро́с** ярҙамсы һорау

**НАВОЕВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күп (етерлек) һуғышыу, һуғышып арыу (туйыу), арығансы һуғышыу

**НАВО́З** *м* тиҙәк, тиреҫ; **удобря́ть наво́зом** тиҙәк менән ашлау, тиреҫләү

**НАВО́ЗИТЬ** *несов. что* тиреҫләү, тиҙәкләү, ашлау; **наво́зить зе́млю** ерҙе ашлау

**НАВОЗИ́ТЬ I** *несов. см.* **навезти́**

**НАВОЗИ́ТЬ II** *сов. что, кого-чего* ташып алыу (ҡуйыу); **навози́ть се́на** бесән ташып ҡуйыу

**НАВО́ЗИТЬСЯ** *несов. страд. от* **наво́зить**

**НАВОЗИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (арығансы) маташыу (булашыу); **навози́ться с хлопотли́вым де́лом** мәшәҡәтле эш менән арығансы булышыу

**НАВО́ЗНИК** *м* тиреҫ ҡуңыҙы

**НАВО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое тиреҫ ...ы, тиреҫләнгән; **наво́зная ку́ча** тиреҫ өйөмө; **наво́зные ви́лы** тиреҫ һәнәге; **наво́зное по́ле** тиреҫләнгән баҫыу; **наво́зный жук** тиреҫ ҡуңыҙы; **наво́зные му́хи** тиреҫ себендәре

**НАВО́Й** *м*; *текст.* шөйтө (*киндер һуҡҡандағы буйлыҡ*); **тка́цкий наво́й** туҡыу шөйтөһө

**НАВОЛНОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (ныҡ) тулҡынланыу, борсолоу, тынысһыҙланыу; **наволнова́ться пе́ред экза́менами** имтихан алдынан ныҡ тулҡынланыу

**НА́ВОЛОЧКА** и *уст.* **НА́ВОЛОКА** *ж* (*верхняя*) яҫтыҡ (мендәр) тышы; (*нижняя*) кәпрән

**НА́ВОЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое яҫтыҡ (мендәр) тышлығы; **на́волочные пу́говицы** яҫтыҡ тышлығына төймәләр

**НАВОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **наворожи́ть**

**НАВОРА́ЧИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **наворoти́ть 2.** *разг.* (*наматывать*) урау, сырмау; **навора́чивать на уди́лище ле́ску** ҡармаҡ сыбығына ҡармаҡ ебен урау

**НАВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *разг.* (*накручиваться*) уралыу, сырмалыу; **на шпу́льку навора́чивались ни́тки** сүрегә еп сырмалды **2.** *страд. от* **навора́чивать**

**НАВОРОВА́ТЬ** *сов. что, чего* күп итеп урлау, урлап йыйыу

**НАВОРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **наворова́ть**

**НАВОРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наворо́вывать**

**НАВОРОЖИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** (*предсказать*) күрәҙәлек итеү, алдан әйтеп биреү; **наворожи́ть сча́стья** бәхетте алдан әйтеп биреү **2.** (*наколдовать*) сихырлау; **наворожи́ть во́ду** һыуҙы сихырлау

**НАВОРОТИ́ТЬ** *сов. что, чего; разг.* **1.** тәртипһеҙ рәүештә өйөп ҡуйыу, ауҙарып (ҡуптарып) ташлау **2.** *перен.* (бик) күп эшләп (һөйләп, яҙып) ташлау, уйлап тормай эшләп ҡуйыу; **наворoти́ть дел от ра́дости** шатлыҡтан бик күп эш эшләп ташлау

**НАВОРОШИ́ТЬ** *сов. что, чего; разг.* (*о сене, соломе и т.п.*) ҡабартып (әйләндереп) сығыу; **наворoши́ть се́на** бесәнде әйләндереп сығыу

**НАВОРЧА́ТЬ** *сов. на кого-что; разг.* һуҡраныу, һуҡранып ҡуйыу, мығырлап әрләп (орошоп) ташлау; **наворча́ть на малыша́** бәләкәскә һуҡраныу

**НАВОСТРИ́ТЬ: навостри́ть лы́жи** тайырға (ҡасырға) йыйыныу, ҡасып китеү; **навостри́ть у́ши** *прям., перен.* ҡолаҡ ҡарпайтыу (торғоҙоу, һағайтыу)

**НАВОЩИ́ТЬ** *сов. что* балауыҙлау, балауыҙ менән ышҡыу, балауыҙ һеңдереү; **навощи́ть ни́тки** епте балауыҙлау

**НАВРА́ТЬ** *сов.; разг.* **1.** *что, чего* и *без доп.* ялғанлау, алдау, алдап һөйләү, алдашыу; **навра́ть без нужды́** кәрәкһеҙгә ялғанлау **2.** *в чём* (*ошибиться*) хата яһау (ебәреү), яңылышыу; **навра́ть в расчётах** иҫәптә хата ебәреү

**НАВРЕДИ́ТЬ** *сов. кому-чему* ҙур зыян (зарар) килтереү; **поспе́шностью навреди́ть де́лу** ашығыу арҡаһында эшкә зарар килтереү

**НАВРЯ́Д ЛИ** *частица; разг.* (*при выражении сомнения в достоверности высказываемого*) ай-һай, -ырме/-ерме икән һуң; **навря́д ли он прие́дет сюда́** ай-һай, ул бында килерме икән һуң

**НАВСЕГДА́** *нареч.* мәңгегә, ғүмергә, бөтөнләйгә; **навсегда́ осе́сть в дере́вне** ауылда бөтөнләйгә (йәшәргә) ҡалыу

**НАВСТРЕ́ЧУ** *нареч.* **1.** ҡаршы, ҡара-ҡаршы, ҡаршыға; **малы́ш бежи́т к ма́тери навстре́чу** сабый әсәһенә ҡаршы йүгерә **2.** *в знач. предлога с дат. п.* ҡаршы; **бро́ситься навстре́чу иду́щим** ҡаршы килеүселәргә ташланыу ♦ **идти́ навстре́чу** *кому-чему* ярҙам итеү, үтенесен ҡәнәғәтләндереү

**НАВЫ́ВОРОТ** *нареч.; разг.* **1.** (*наизнанку*) тиҫкәре (кире) яғы менән; **наде́ть руба́шку навы́ворот** күлдәкте тиҫкәре яғы менән кейеү **2.** (*наоборот*) киреһенсә; **всё де́лать навы́ворот** бөтәһен дә киреһенсә эшләү

**НА́ВЫК** *м* күнекмә, оҫталыҡ; **трудовы́е на́выки** хеҙмәт күнекмәләре; **приобрести́ на́вык** оҫталыҡ туплау

**НАВЫ́КАТ** и **НАВЫ́КАТЕ: глаза́ навы́кат** (**навы́кате**) аҡыш (таҫыр) күҙ

**НАВЫ́ЛЕТ** *нареч.* үтәләй тишеп, үтәнән-үтә(гә); **он ра́нен пу́лей навы́лет** уны пуля үтәнән-үтәгә яралаған

**НАВЫ́НОС** *нареч.; разг.* алып (сығыу өсөн) сығыуға; **сок навы́нос** алып сығыу өсөн һут

**НАВЫ́ПУСК** *нареч.* (өҫкә, өҫтөнән, тышҡа) сығарып (*салбар, юбка, итәк һ.б. эсенә тыҡмайынса*); **носи́ть руба́ху навы́пуск** күлдәкте сығарып кейеү

**НАВЫ́РЕЗ** *нареч.* ҡырҡып ҡарап; **купи́ть арбу́з навы́рез** ҡарбуҙды ҡырҡып ҡарап алыу

**НАВЫ́ТЯЖКУ: стоя́ть навы́тяжку** туп-тура баҫып тороу, төҙ ҡатып тороу

**НАВЬЮ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **навью́чить**

**НАВЬЮ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **навью́читься 2.** *страд. от* **навью́чивать**

**НАВЬЮ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* артмаҡ аҫыу, артмаҡлау, (йөк) артыу, арҡалау, йөкләтеү; **навью́чить ло́шадь** атҡа йөк артмаҡлау; **навью́чить мешо́к** тоҡ арҡалау

**НАВЬЮ́ЧИТЬСЯ** *сов. чем; прост.* (бик күп, ауыр) күтәреү, (йөк) аҫыу, йөкмәнеү; **навью́читься чемода́нами** сумаҙандар менән йөкмәнеү

**НАВЯЗА́ТЬ I** *сов.* **1.** *что, на что* (*завязать*) тағыу, урау, бәйләү, тағып (урап, бәйләп) ҡуйыу; **навяза́ть на ше́ю плато́к** муйынға яулыҡ бәйләү **2.** *что, кому-чему; перен.* (*заставить принять что-л. против воли*) көсләп тағыу, мәжбүр итеү; **навяза́ть проти́внику бой** дошманды һуғышырға мәжбүр итеү **3.** *что, чего* (*изготовить вязанием*) бәйләү, бәйләп ҡуйыу (*күп итеп*); **навяза́ть пять пар ва́режек** биш пар бейәләй бәйләү

**НАВЯЗА́ТЬ II** *несов. см.* **навя́знуть**

**НАВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.; разг.* бәйләнеү, көсләп тағылыу, тырышыу; **навяза́ться в друзья́** дуҫ булырға тырышыу

**НАВЯ́ЗНУТЬ** *сов.* эләгеү, йәбешеү; **грязь навя́зла в колёсах** тәгәрмәстәргә бысраҡ йәбешкән ♦ **навя́зло в зуба́х** теңкәгә тейеп бөттө

**НАВЯ́ЗЧИВОСТЬ** *ж* йөҙәтеүсәнлек, бәйләнсеклек, теңкәгә тейеү; **навя́зчивость сосе́да** күршенең бәйләнсеклеге

**НАВЯ́ЗЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәйләнсек, йөҙәтеүсән, теңкәгә тейгес; **навя́зчивый челове́к** бәйләнсек кеше **2.** *перен.* баштан китмәй торған, баш ҡатырғыс; **навя́зчивая мысль** баштан китмәй торған уй

**НАВЯ́ЗЫВАНИЕ** *с см.* **навя́зывать**; **навя́зывание своего́ мне́ния** үҙеңдең фекереңде көсләп тағыу

**НАВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **навяза́ть** I

**НАВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **навяза́ться 2.** *страд. от* **навя́зывать**

**НАВЯ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **навя́лить**

**НАВЯ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **навя́ливать**

**НАВЯ́ЛИТЬ** *сов. что, чего* ҡаҡлау; **навя́лить ры́бы** балыҡ ҡаҡлау

**НАГА́ДИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*о животных*) бысратып бөтөрөү **2.** *кому*; *перен.*, *прост.* (*навредить*) (йәшерен) зарар килтереү, әшәкелектәр эшләү; **нага́дить не́другу** дошманға йәшерен зарар килтереү

**НАГА́ЙКА** *ж* ҡамсы; **рукоя́тка нага́йки** ҡамсы һабы

**НАГА́Н** *м* наган; **стреля́ть из нага́на** нагандан атыу

**НАГА́Р** *м* көйөк, яныҡ; **свечно́й нага́р** шәм яныҒы

**НАГИБА́ТЬ** *несов. см.* **нагну́ть**

**НАГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нагну́ться 2.** *страд. от* **нагиба́ть**

**НАГИШО́М** *нареч.*; *разг.* яланғас, шыр яланғас, шәп-шәрә; **ходи́ть нагишо́м** шәп-шәрә йөрөү

**НАГЛА́ДИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* яҡшылап (һәйбәт итеп) үтекләү; **нагла́дить руба́шку** күлдәкте яҡшылап үтекләү **2.** *что, чего* үтекләү, үтекләп алыу (ҡуйыу); **нагла́дить мно́го белья́** күп итеп кер үтекләү

**НАГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **нагла́дить**

**НАГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нагла́живать**

**НАГЛА́ЗНИК** *м* **1.** күҙлек, күҙелдерек (*күҙҙе зарарланыуҙан һаҡлау өсөн*) **2.** ҡолаҡһа (*өркәк ат ян-яҡҡа ҡарап бармаһын өсөн, йүгәнгә тегелгән күн*); **ко́жаные нагла́зники** күн ҡолаҡһалар

**НАГЛА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое күҙ …ы, күҙгә бәйләй торған; **нагла́зная повя́зка** күҙ бәйләүесе

**НАГЛЕ́ТЬ** *несов.* (саманан тыш) оятһыҙланыу, һөмһөҙләнеү, битһеҙләнеү, оятһыҙлана барыу

**НАГЛЕ́Ц** *м* оятһыҙ (битһеҙ) кеше, һөмһөҙ; **проучи́ть наглеца́** һөмһөҙҙөң арт һабағын уҡытыу

**НАГЛЕЦА́: с наглецо́й** *разг.* оятһыҙыраҡ

**НА́ГЛО** *нареч.* оятһыҙ рәүештә; **на́гло обма́нывать** оятһыҙ рәүештә алдау

**НА́ГЛОСТЬ** *ж* оятһыҙлыҡ, битһеҙлек, һөмһөҙлөк; **набра́ться на́глости** оятһыҙлыҡ күрһәтеү

**НАГЛОТА́ТЬСЯ** *сов. чего* (бик) күп йотоу (йотоп йөрөү); **наглота́ться лека́рств** бик күп дарыу йотоу; **наглота́ться пы́ли** күп туҙан йотоу

**НАГЛУПИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* йүләрлек (ахмаҡлыҡ, иҫәрлек) эшләп ташлау; **наглупи́ть в де́ле** *каком-л. ниндәй ҙә булһа* эштә ахмаҡлыҡ эшләп ташлау

**НА́ГЛУХО** *нареч.* **1.** бөтөнләй томалап, ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп; **сунду́к на́глухо приби́т к по́лу** һандыҡ иҙәнгә ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп ҡаҙаҡланған; **заколоти́ть о́кна на́глухо** тәҙрәләрҙе бөтөнләй томалап ҡаҙаҡлау **2.** ныҡ (ыҫҡынмаҫлыҡ) итеп; **на́глухо застегну́ть оде́жду** кейемдең бөтә төймәләрен ныҡ итеп ҡаптырыу

**НАГЛУШИ́ТЬ** *сов. что, кого-чего*; *разг.* миңрәтеү, шаңҡытыу, иҫһеҙләндереү; **наглуши́ть ры́бы** балыҡ шаңҡытыу

**НА́ГЛЫЙ,** -ая, -ое оятһыҙ, битһеҙ, һөмһөҙ, әҙәпһеҙ, тупаҫ; **на́глый челове́к** һөмһөҙ кеше; **на́глый отве́т** тупаҫ яуап; **на́глый посту́пок** әҙәпһеҙ ҡылыныш

**НАГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *на кого-что* ҡарап (күреп) туйыу, туйғансы ҡарау; **не могу́ на неё нагляде́ться** уға ҡарап туя алмайым **2.** *чего* (*многое повидать*) күпте күреү, баштан кисереү

**НАГЛЯ́ДНО** *нареч.* асыҡ, асыҡ рәүештә, асыҡ итеп; **нагля́дно показа́ть** асыҡ итеп күрһәтеү

**НАГЛЯ́ДНОСТЬ** *ж* **1.** асыҡлыҡ; **нагля́дность приме́ра** миҫалдың асыҡлығы **2.** күргәҙмәлелек; **нагля́дность обуче́ния** уҡытыуҙың күргәҙмәлелеге

**НАГЛЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** асыҡ, күренеп торған, күрһәтмәле; **нагля́дное доказа́тельство** асыҡ дәлил **2.** күргәҙмә(ле), күрһәтмә; **нагля́дное обуче́ние** күргәҙмәле уҡытыу; **нагля́дные посо́бия** күргәҙмә әсбаптар

**НАГНА́ИВАТЬ** *несов. см.* **нагнои́ть**

**НАГНА́ИВАТЬСЯ** *несов. см.* **нагнои́ться**

**НАГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *прям.* и *перен.* ҡыуып етеү; **теплохо́д нагна́л ба́ржу** теплоход баржаны ҡыуып етте; **нагна́ть други́х в учёбе** уҡыуҙа башҡаларҙы ҡыуып етеү **2.** *что, кого-чего* ҡыуып килтереү, ҡыуып килтереп туплау (йыйыу, тултырыу); **ве́тер нагна́л ту́чи** ел болоттарҙы ҡыуып килтерҙе **3.** *что, чего* (*наготовить перегонкой*) ҡыуыу, ҡыуып алыу (сығарыу); **нагна́ть спи́рту** спирт ҡыуып алыу **4.** *что, чего*; *перен.*, *разг.* (*внушить какое-л. чувство*) килтереү, төшөрөү, һалыу, ҡалдырыу; **нагна́ть стра́ху** ҡурҡыу һалыу; **нагна́ть сон** йоҡо килтереү; **нагна́ть тоску́** һағышҡа һалыу ♦ **нагна́ть це́ну** хаҡын үтә арттырыу (күтәреү)

**НАГНЕСТИ́** *сов. что* тултырыу, ҡыҫып (баҫым менән) тултырыу; **нагнести́ во́здух** һаваны баҫым менән тултырыу ♦ **нагнести́ давле́ние** *тех.* баҫымды арттырыу

**НАГНЕТА́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* нагнетатель (*һава ҡыҫыу приборы*)

**НАГНЕТА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫып тултыра торған, ҡыҫыу …ы; **нагнета́тельный насо́с** ҡыҫыу насосы

**НАГНЕТА́ТЬ** *несов. см.* **нагнести́**

**НАГНЕТА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **нагнета́ть**

**НАГНОЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **нагнои́ться**; **нагное́ние глаз** күҙҙең эренләүе **2.** эренле шеш; **ме́стное нагное́ние** тәндәге эренле шеш

**НАГНОИ́ТЬ** *сов. что* серетеү, серетеп бөтөрөү; **нагнои́ть овоще́й** йәшелсәләрҙе серетеп бөтөрөү

**НАГНОИ́ТЬСЯ** *сов.* эренләү, эрен йыйыу; **ра́на нагнои́лась** йәрәхәт эренләгән

**НАГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* эйеү, эйелтеү, бөгөү; **нагну́ть ве́тку** ботаҡты эйелтеү; **нагну́ть го́лову** башты эйеү

**НАГНУ́ТЬСЯ** *сов.* эйелеү, бөгөлөү, иңкәйеү; **нагну́ться, что́бы сорва́ть цветы́** сәскә өҙөргә эйелеү

**НАГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **наговори́ть**

**НАГОВО́Р** *м* **1.** *разг.* (*клевета*) яла, ошаҡ; **наговóр злых люде́й** яуыз кешеләр ялаһы **2.** (*заклинание*) сихыр, өшкөрөү, им-том һүҙҙәре; **наговóр от зубно́й бо́ли** теш һыҙлауын баҫыу өсөн им-том һүҙҙәре

**НАГОВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* күп һөйләү, артыҡ (күп) һөйләп ташлау; **наговори́ть чепухи́** юҡ-барҙы күп һөйләп ташлау **2.** *на кого*; *разг.* ошаҡлау, яла яғыу; **наговори́ть на че́стного челове́ка** намыҫлы кешегә яла яғыу **3.** *что*; *тех.* һөйләүҙе яҙҙырыу (*пластинкаға*); **наговори́ть письмо́ на пласти́нку** пластинкаға һөйләп хат яҙҙырыу **4.** *что* өшкөрөү, им-том итеү; **наговори́ть боле́знь** сирҙе им-том итеү

**НАГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы һөйләшеү, һөйләшеп туйыу; **наговори́ться в свобо́дное вре́мя** буш ваҡытта туйғансы һөйләшеү

**НАГОВО́РНЫЙ,** -ая, -ое сихырланған, өшкөрөлгән, им-том ителгән; **наговóрная соль** өшкөрөлгән тоҙ

**НАГО́Й,** -ая, -ое *прям., перен.* яланғас, шәрә; **наго́й младе́нец** шәрә бәпес; **наги́е ве́тви** яланғас ботаҡтар; **наги́е холмы́** яланғас ҡалҡыулыҡтар

**НАГОЛО́** и **НА́ГОЛО** *нареч.* **1.** (*о шашке, сабле и т.п.*) ҡындан һурылған; **ша́шка наголо́** ҡындан һурылған ҡылыстар **2.** (*о стрижке*) таҡыр итеп ҡырып алдырыу (*сәсте*); **стри́женая на́голо голова́** таҡыр итеп ҡырылған баш

**НА́ГОЛОВУ: разби́ть (разгроми́ть) на́голову** тар-мар итеү, ҡырып бөтөрөү (*дошманды*)

**НАГОЛОДА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аҫҡа интегеү, аслыҡтан яфа сигеү, асығыу; **наголода́ться в войну́** һуғыш ваҡытында аҫҡа интегеү

**НАГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тышһыҙ, тышланмаған (*толоп, тун тураһында*); **наго́льный полушу́бок** тышланмаған ҡыҫҡа тун

**НАГОНЯ́Й** *м*; *разг.* ҡаты шелтә; **получа́ть нагоня́й** ҡаты шелтә алыу

**НАГОНЯ́ТЬ I** *несов. см.* **нагна́ть**

**НАГОНЯ́ТЬ II** *сов.* **1.** *кого*; *разг.* туйғансы ҡыуып йөрөтөү, ҡыуып индереү; **щено́к вдо́воль нагоня́л кур** көсөк тауыҡтарҙы туйғансы ҡыуып йөрөттө **2.** *кого*; *охот.* йәнлекте (дөрөҫ) ауларға (ҡыуырға) өйрәтеү (*эттәрҙе*); **нагоня́ть го́нчую** һунар этен йәнлек ҡыуырға өйрәтеү

**НА-ГОРА́** *нареч.*; *горн.* өҫкә, ер өҫтөнә; **вы́дать у́голь на-гора́** таш күмерҙе ер өҫтөнә сығарыу

**НАГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **нагороди́ть**

**НАГОРА́ТЬ** *несов. см.* **нагоре́ть**

**НАГОРЕВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күп ҡайғырыу, ҡайғырып (ҡайғынан) туйыу; **вдо́воль нагорева́ться** күп ҡайғырыу

**НАГОРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡоромланған, ҡоромло; **нагоре́лый фити́ль** ҡоромланған филтә

**НАГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡоромланыу, күмерләнеү; **свеча́ нагоре́ла** шәмдең осо ҡоромланған **2.** *чего безл.*; *разг.* яныу, яндырылыу, тотолоу; **по счётчику электри́чества нагоре́ло немно́го** счётчик буйынса электр әҙ янған **3.** *кому безл.*; *прост.* эләгеү (*яза, шелтә тураһында*); **за разби́тый гра́дусник ему́ нагоре́ло** ватылған градусник өсөн уға эләкте

**НАГО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡалҡыу(лы), таулы; **наго́рная страна́** таулы ил **2.** бейек, таулы; **наго́рный бе́рег реки́** йылғаның бейек яры

**НАГОРОДИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** кәртәләү, ҡойма тотоу, күп итеп төҙөп ҡуйыу; **нагороди́ть забо́ров** ҡойма(лар) тотоу **2.** *прост.* тәртипһеҙ рәүештә өйөп ҡуйыу; **нагороди́ть ку́чу хла́ма** сүп-сар өйөп ҡуйыу **3.** *перен., прост.* төрлө юҡ-барҙы һөйләү, һөйләп (яҙып) ташлау; **нагороди́ть чепухи́** юҡ-барҙы һөйләү

**НАГО́РЬЕ** *с* ҡалҡыулыҡ, таулыҡ; **леси́стые наго́рья** урманлы таулыҡтар

**НАГОСТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҙаҡ (туйғансы) ҡунаҡ булыу; **вдо́воль нагости́ться у родны́х** туғандарҙа туйғансы ҡунаҡ булыу

**НАГОТА́** *ж*; *прям., перен.* яланғаслыҡ, шәрәлек; **нагота́ дете́й** балаларҙың шәрәлеге; **нагота́ берёз** ҡайындарҙың яланғаслығы ♦ **во всей наготе́** ап-асыҡ итеп, биҙәүһеҙ, буяуһыҙ

**НАГОТА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **нагото́вить**

**НАГОТО́ВЕ** *нареч.* әҙер; **быть нагото́ве** әҙер тороу (булыу)

**НАГОТО́ВИТЬ** *сов. что*; *разг.* етерлек итеп (күп итеп) әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу; **нагото́вить на́ зиму дров** ҡышҡа етерлек итеп утын әҙерләп ҡуйыу

**НАГОТО́ВИТЬСЯ** *сов. чего, обычно с отриц. "не"*; *разг.* әҙерләп еткерә алмау; **на всех не нагото́вишься оде́жды** бөтәһенә лә кейем әҙерләп еткерә алмаҫһың

**НАГРА́БИТЬ** *сов. что* талап йыйыу (алыу)

**НАГРАВИРОВА́ТЬ** *сов. что, чего* гравёрлау (*металға, ташҡа, һөйәккә һ.б. һырлап һүрәт, биҙәк яһау (төшөрөү), текст яҙыу*); **награвирова́ть фотогра́фии** фотографияны гравёрлау

**НАГРА́ДА** *ж* бүләк; **де́нежная награ́да** аҡсалата бүләк

**НАГРАДИ́ТЬ** *сов. кого-что, чем* **1.** *прям., перен.* бүләкләү, бүләк итеү (биреү); **награди́ть о́рденом** орден менән бүләкләү; **награди́ть**

**не́жным взгля́дом** яғымлы ҡараш бүләк итеү **2.** биреү; **приро́да награди́ла его́ тала́нтом** тәбиғәт уға һәләт биргән

**НАГРАДНО́Й,** -ая, -ое **1.** бүләк ...ы, бүләкләү ...ы, бүләк(тәр) биреү ...ы; **наградно́й спи́сок** бүләкләү исемлеге; **наградны́е де́ньги** бүләк аҡсаһы **2.** *в знач. сущ.* **наградны́е** *мн.* бүләк итеп бирелә торған аҡса, бүләк аҡсаһы; **разда́ча наградны́х** бүләк аҡсаһын таратыу

**НАГРАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **награди́ть**

**НАГРАЖДА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **награжда́ть**

**НАГРАЖДЕ́НИЕ** *с см.* **награди́ть**; **награжде́ние ветера́на** ветеранды бүләкләү

**НАГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **нагрести́**

**НАГРЕБА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **нагреба́ть**

**НАГРЕ́В** *м* **1.** *см.* **нагре́ть** — **нагрева́ть**; **нагре́в ста́ли** ҡорос(тоң) ҡыҙыуы **2.** йылыныу (йылытыу) дәрәжәһе; **необходи́мый нагре́в печи́** мейестең тейешле дәрәжәлә йылыныуы **3.** *тех.* йылытыу майҙаны; **нагре́в парово́го котла́** пар ҡаҙанының йылытыу майҙаны

**НАГРЕВА́НИЕ** *с см.* **нагрева́ть**, **нагрева́ться**; **нагрева́ние воды́** һыуҙың йылыныуы

**НАГРЕВА́ТЕЛЬ** *м* йылытҡыс; **нагрева́тель воды́** һыу йылытҡыс

**НАГРЕВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йылытҡыс ...ы, йылытыу ...ы; **нагрева́тельные прибо́ры** йылытыу приборҙары **2.** *тех.* йылытыла (ҡыҙҙырыла) торған; **нагрева́тельная пове́рхность** йылытыла торған майҙан

**НАГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **нагре́ть**

**НАГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нагре́ться** **2.** *страд. от* **нагрева́ть**

**НАГРЕСТИ́** *сов. что, чего* тырмап өйөү, (тырма менән) йыйыу (йыйып өйөү), көрәү, көрәп йыйыу (өйөү); **нагрести́ се́на** бесән йыйыу; **нагрести́ снега́** ҡар көрәү

**НАГРЕ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **нагре́ть** **2.** *прил.* йылы, йылынған, ҡыҙған; **нагре́тая по́чва** йылынған тупраҡ

**НАГРЕ́ТЬ** *сов. что, чего* йылытыу, ҡыҙҙырыу, эҫетеү; **нагре́ть во́ду** һыу йылытыу ♦ **нагре́ть бока́** *кому* туҡмау; **нагре́ть ру́ки** *на чём* намыҫһыҙ рәүештә ҡулға байлыҡ төшөрөү

**НАГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* йылыныу, ҡыҙыу, эҫе; **пе́чка нагре́лась** мейес йылынды

**НАГРЕШИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* гөнаһлы эш(тәр) эшләү, гөнаһ ҡылыу

**НАГРИМИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* гримлау, грим һалыу (һөртөү, яғыу); **нагримирова́ть лицо́** биткә грим һалыу

**НАГРИМИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* гримланыу, грим һалыу (һөртөнөү, яғыу)

**НАГРОМОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **нагромозди́ть**

**НАГРОМОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нагромозди́ться** **2.** *страд. от* **нагроможда́ть**

**НАГРОМОЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **нагромозди́ть** **2.** өйөм; **нагроможде́ние камне́й** таштар өйөмө **3.** *перен.* (бик күп) кәрәкһеҙ (артыҡ, кәрәгенән тыш) менән тулы; **нагроможде́ние цита́т** кәрәгенән тыш цитаталар менән тулы

**НАГРОМОЗДИ́ТЬ** *сов. что* **1.** күп итеп өйөү (ҡуйыу), тәртипһеҙ рәүештә өҫтө-өҫтөнә өйөү (ҡуйыу, ҡороу, төҙөү); **нагромозди́ть бо́чки** мискәләрҙе тәртипһеҙ рәүештә өҫтө-өҫтөнә өйөп ҡуйыу **2.** *перен.* кәрәгенән тыш (кәрәкһеҙ) ... менән тултырыу; **нагромозди́ть статью́ цита́тами** мәҡәләне кәрәкһеҙ цитаталар менән тултырыу

**НАГРОМОЗДИ́ТЬСЯ** *сов.* өйөлөү, йыйылыу; **снег нагромозди́лся горо́й** ҡар тау кеүек өйөлдө

**НАГРУБИ́ТЬ** *сов. кому* тупаҫ һүҙҙәр әйтеү (әйтеп ташлау); **нагруби́ть това́рищу** иптәшеңә тупаҫ һүҙҙәр әйтеп ташлау

**НАГРУ́ДНИК** *м* **1.** күкрәксә, түшелдерек, селтәр; **вы́шитый нагру́дник** сигеүле түшелдерек; **де́тский нагру́дник** бала күкрәксәһе **2.** күмелдерек; **седло́ с нагру́дником** күмелдерекле эйәр

**НАГРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*предназначенный для ношения на груди*) түш ...ы, күкрәк ...ы, түшкә (күкрәккә) таға (тағыла) торған; **нагру́дный карма́н** түш кеҫәһе **2.** (*находящийся на груди*) түш ...ы, күкрәк ...ы; **нагру́дные мы́шцы** күкрәк мускулдары

**НАГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **нагрузи́ть**

**НАГРУЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нагрузи́ться** **2.** *страд. от* **нагружа́ть**

**НАГРУЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** тейәү, (тейәп) тултырыу, һалыу, ҡуйыу; **нагрузи́ть чемода́н веща́ми** сумаҙанды әйбер менән тултырыу; **нагрузи́ть маши́ну овоща́ми** машинаға йәшелсә тейәү **2.** *перен., разг.* йөкмәтеү, йөкләү; **нагрузи́ть рабо́той** эш йөкмәтеү

**НАГРУЗИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күп (йөк) күтәреү; **нагрузи́ться тяжёлыми су́мками** бик күп ауыр муҡсалар (сумкалар) күтәреү

**НАГРУ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **нагрузи́ть** 1; **нагру́зка муки́** он тейәү **2.** (*груз*) йөк, ауырлыҡ; **автомаши́ны с тяжёлой нагру́зкой** ауыр йөк тейәлгән автомашиналар **3.** (*работа*) эш, йөкләмә; **уче́бная нагру́зка** уҡыу йөкләмәһе **4.** *тех.* йөкләнеш; **максима́льная нагру́зка мото́ра** моторҙың иң юғары йөкләнеше

**НАГРУ́ЗОЧНЫЙ,** -ая, -ое тейәү ...ы; **нагру́зочный рыча́г** тейәү рычагы

**НАГРУ́ЗЧИК** *м* йөк тейәүсе ҡорамал; **навесно́й нагру́зчик на тра́ктор** тракторға йөк тейәүсе аҫмалы ҡорамал

**НАГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **нагры́зть**

**НАГРЫ́ЗТЬ** *сов. что, чего* **1.** (*разгрызть*) (тешләп) ярыу, ватыу; **нагры́зть се́мечек** көнбағыш ярыу **2.** (*прогрызть*) кимереп тишеү (тишеп сығарыу); **кры́сы нагры́зли дыр** ҡомаҡтар кимереп тишектәр тишкән

**НАГРЯЗНИ́ТЬ** *сов.* бысратыу, бысратып бөтөрөү; **нагрязни́ть в пере́дней** алғы бүлмәне бысратып бөтөрөү

**НАГРЯ́НУТЬ** *сов.* көтмәгәндә килеп сығыу (төшөү), һөжүм итеү; **нагря́нули го́сти** көтмәгәндә ҡунаҡтар килеп төштө; **нагря́нула беда́** көтмәгәндә бәлә килеп сыҡты

**НАГУ́Л** *м*; *с.-х.* **1.** (*откорм*) һимертеү (*малдарҙы*); **нагу́л бычко́в** үгеҙ башмаҡтар һимертеү **2.** (*степень откормленности*) һимеҙлек (һимереү) дәрәжәһе, көрлөк (*мал тураһында*); **максима́льный нагу́л теля́т** быҙауҙарҙың юғары дәрәжәләге һимеҙлеге

**НАГУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **нагуля́ть**

**НАГУ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нагуля́ться** **2.** *страд. от* **нагу́ливать**

**НАГУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* һимертеү өсөн билгеләнгән (тәғәйенләнгән); **нагу́льный молодня́к** һимертеү өсөн тәғәйенләнгән йәш мал

**НАГУЛЯ́ТЬ** *сов. что, чего*; *прям.* и *перен.* һимереү, көрәйеү, көрөгөү; **о́вцы на па́стбище нагуля́ли жи́ру** һарыҡтар көтөүлектә йөрөп көрәйгән ♦ **нагуля́ть аппети́т** *разг.* һауала йөрөп аппетитты асыу; **нагуля́ть брюшко́** *шутл.* ҡорһаҡ үҫтереү

**НАГУЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) йөрөү, йөрөп туйыу; **нагуля́ться на све́жем во́здухе** саф һауала туйғансы йөрөү

**НАД** и **НАДО** *предлог с твор. п.* **1.** (*при обозначении лица, предмета, выше которого кто-что-л. находится*) өҫтөнән, өҫтәрәк, өҫкө яҡҡа табаныраҡ; **над го́родом пролете́л самолёт** ҡала өҫтөнән самолёт осоп үтте

**2.** (*при указании местоположения кого-чего-л. относительно кого-чего-л.*) өҫтөндә, тапҡырлаш; **ла́мпа виси́т над столо́м** лампа өҫтәл өҫтөндә аҫылынып тора

**3.** (*при обозначении направленности действия*) өҫтөндә; **труди́ться над статьёй** мәҡәлә өҫтөндә эшләү

**НАД...** (**надо...**, **надъ...**) *приставка* **1.** *ҡылым яһай, уның түбәндәге мәғәнәләре бар*: 1) *өҫтәү, ҡушыу, ҙурайтыу, арттырыу һәм ялғауҙы белдерә, мәҫ.*, **надвяза́ть** өҫтәп (ҡушып) бәйләү; **надкле́ить** ялғап (ҡушып) йәбештереү; **надстро́ить** өҫтәп төҙөү; 2) *хәрәкәттең бөтә предметҡа таралмайынса, бер өлөшөнә генә* (*аҙ ғына*) *таралғанын аңлата, мәҫ.*, **надре́зать** бер аҙ ғына киҫеү; **надкуси́ть** әҙ генә тешләп ҡуйыу **2.** *исем һәм сифаттарға ялғанып, "өҫ", "өҫтө", "өҫтөндәге" мәғәнәләрен белдерә, мәҫ.*, **надбро́вье** ҡаш өҫтө; **надзе́мный** ер өҫтө ...ы

**НАДАВА́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* күп итеп биреү, күп тапҡыр(ҙар) биреү, -лап/-ләп ташлау; **надава́ть обеща́ний** күп тапҡырҙар вәғәҙә биреү; **надава́ть де́нег** күп итеп аҡса биреү

**НАДАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *на что* (*нажать*) баҫыу; **надави́ть на кно́пку звонка́** звонок төймәһенә баҫыу **2.** *что, чего* (*выжать*) һығып алыу, һығыу; **надави́ть стака́н со́ку** бер стакан һут һығып алыу

**НАДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **надави́ть**

**НАДА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нада́вливать**

**НАДА́ИВАТЬ** *несов. см.* **надои́ть**

**НАДА́РИВАТЬ** *несов. см.* **надари́ть**

**НАДАРИ́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* күп итеп бүләк биреү; **надари́ть пода́рков** күп итеп бүләк биреү

**НАДБА́ВИТЬ** *сов. что*; *разг. см.* **наба́вить**

**НАДБА́ВКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **надба́вить** **2.** өҫтәмә; **надба́вка к зарпла́те** эш хаҡына өҫтәмә (*аҡса*)

**НАДБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **надба́вить**

**НАДБА́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* өҫтәмә; **надба́вочные це́ны** өҫтәмә хаҡ(тар)

**НАДБИВА́ТЬ** *несов. см.* **надби́ть**

**НАДБИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* китеү, китеп алыу, сатнатыу; **надби́ть кирпи́ч** кирбесте китеп алыу; **надби́ть ча́шку** сынаяҡ сатнатыу

**НАДБРО́ВНЫЙ,** -ая, -ое ҡаш өҫтөндәге; **надбро́вная часть лба** маңлайҙың ҡаш өҫтөндәге өлөшө ♦ **надбро́вные ду́ги** *анат.* ҡаш өҫтө дуғаһы

**НАДБРО́ВЬЕ** *с* ҡаш өҫтө

**НАДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **надви́нуть**

**НАДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **надви́нуться** **2.** *страд. от* **надвига́ть**

**НАДВИЖНО́Й,** -ая, -ое шыуҙырыла (этелә) торған; **надвижны́е ство́рки окна́** шыуҙырыла торған тәҙрә ҡапҡастары

**НАДВИ́НУТЬ** *сов. что, на кого-что* этеп ҡаплау, ҡаплап ҡуйыу, батырып (төшөрөп) кейеү; **надви́нуть ша́пку на лоб** бүректе маңлайға батырып кейеү

**НАДВИ́НУТЬСЯ** *сов.*; *прям.* и *перен.* яҡынлашыу, аҡрынлап ҡаплау, етеү, етеп килеү, килеп етеү; **надви́нулась зима́** ҡыш килеп етте; **на окре́стности надви́нулся тума́н** тирә-яҡты аҡрынлап томан ҡаплап алды; **надви́нулась ста́рость** ҡартлыҡ яҡынлашты

**НАДВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое һыу өҫтө ...ы, һыу өҫтөндәге; **надво́дная часть су́дна** судноның һыу өҫтө(ндәге) өлөшө

**НА́ДВОЕ** *нареч.* **1.** (*на две части*) икегә, урталайға; **расколо́ть на́двое** икегә ярыу **2.** *разг.* (*двусмысленно*) ике төрлө, төрлөсә; **полага́ть на́двое** ике төрлө итеп һанау ♦ **ба́бушка (ещё) на́двое сказа́ла** икеле, билгеле түгел

**НАДВО́РНЫЙ,** -ая, -ое йорт ...ы; **надво́рные постро́йки** йорт-ҡаралты

**НАДВЯЗА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*удлинить вязанием*) ялғап (ҡушып) бәйләү; **надвяза́ть чулки́** ойоҡто ялғап бәйләү **2.** (*привязав, удлинить*) ялғау, ялғап оҙонайтыу; **надвяза́ть верёвку** бауҙы ялғап оҙонайтыу

**НАДВЯ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **надвяза́ть 2.** *разг.* бәйләп оҙонайтыла (өҫтәлә) торған (өҫтәлгән, оҙонайтылған) өлөш (киҫәк); **надвя́зка на чулка́х** ойоҡтағы өҫтәп бәйләнгән өлөш(тәр)

**НАДВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **надвяза́ть**

**НАДВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **надвя́зывать**

**НАДГОРТА́ННИК** *м*; *анат.* боғаҙ (ҡурылдай) япҡысы, боғаҙ (ҡурылдай) өҫтөндәге кимерсәк

**НАДГОРТА́ННЫЙ,** -ая, -ое боғаҙ (ҡурылдай) өҫтө ...ы, боғаҙ (ҡурылдай) өҫтөндәге; **надгорта́нная часть речево́го аппара́та** һөйләү аппаратының боғаҙ өҫтөндәге өлөшө

**НАДГРО́БИЕ** *с* ҡәбер ташы, ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған һәйкәл; **ка́менное надгро́бие** ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған таш һәйкәл

**НАДГРО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*могильный*) ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған ...ы, ҡәбер ташына яһалған (яҙылған); **надгро́бная плита́** ҡәбер ташы, ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған таш; **надгро́бные рису́нки** ҡәбер ташына яһалған һүрәттәр; **надгро́бная на́дпись** ҡәбер ташына яҙылған һүҙҙәр **2.** (*погребальный*) мәйет күмгәндә әйтелә (үтәлә) торған (*һүҙ, йолалар*); **надгро́бное сло́во** мәйет күмгәндә әйтелә торған һүҙҙәр

**НАДГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **надгры́зть**

**НАДГРЫ́ЗТЬ** *сов.* кимереп (тешләп) алыу; **надгры́зть гру́шу** армытты тешләп алыу

**НАДДАВА́ТЬ** *несов. см.* **надда́ть**

**НАДДА́ТЬ** *сов.*; *разг.* өҫтәү, арттырыу, өҫтәй (арттыра) биреү (төшөү), көсәйтеү; **надда́ть це́ну** хаҡты арттырыу; **надда́ть жа́ру** эҫе өҫтәү

**НАДЕБОШИ́РИТЬ** *сов.*; *разг.* ғауға (янъял, тауыш) ҡуптарыу

**НАДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **наде́ть**

**НАДЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наде́ться 2.** *страд. от* **надева́ть**

**НАДЕ́ЖДА** *ж* ышаныс, өмөт; **после́дняя наде́жда** һуңғы өмөт ♦ **в наде́жде** *на что нимәгә булһа ла* ышанып (ышаныс менән); **возлага́ть наде́жду (наде́жды)** *на кого-что* өмөт итеү, өмөт бағлау; **вселя́ть наде́жду** *в кого-что* өмөтләндереү, өмөт уятыу; **оправда́ть наде́жды** ышанысын аҡлау; **пита́ть наде́жду (наде́жды)** өмөтләнеү, ышаныу, өмөтләнеп (ышанып) тороу; **подаёт наде́жды** өмөтләндерә, ышаныс уята; **потеря́ть наде́жду** өмөт өҙөү, ышаныс(ты) юғалтыу

**НАДЁЖНОСТЬ** *ж* ышаныслылыҡ, ышаныслы булыу; **надёжность игроко́в** уйынсыларҙың ышаныслы булыуы

**НАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое ышаныслы, өмөтлө; **надёжный друг** ышаныслы дуҫ; **надёжный путь** өмөтлө юл

**НАДЕ́Л** *м* **1.** *см.* **надели́ть**; **наде́л земе́льных уча́стков** ер участкалары бүлеү **2.** *ист.* бүлеп бирелгән (бирелә торған) ер, бүлем, надел; **земе́льный наде́л** ер бүлеме

**НАДЕ́ЛАТЬ** *сов. что*, *чего* **1.** (*сделать в каком-л. количестве*) эшләү, яһау (*бер ни тиклем*); **наде́лать игру́шек** уйынсыҡтар яһау **2.** (*сделать что-л. нежелательное*) тыуҙырыу, сығарыу, эшләп ташлау; **наде́лать глу́постей** ахмаҡлыҡ эшләп ташлау; **наде́лать шу́му** шау-шыу сығарыу

**НАДЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что*, *чем* **1.** бүлеп биреү, өлөш сығарыу; **надели́ть землёй** ер бүлеп биреү **2.** *перен.* (*одарить чем-л.*) биреү, тағыу; **приро́да надели́ла его́ хоро́шим го́лосом** тәбиғәт уға тауыш биргән; **надели́ть про́звищем** *кого-л.* ҡушамат тағыу

**НАДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бүлеп бирелә торған (бирелгән); **наде́льная земля́** бүлеп бирелә торған ер

**НАДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **надели́ть**

**НАДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **наделя́ть**

**НАДЁРГАТЬ** *сов. что*, *чего* **1.** (бер ни ҡәҙәр) йолҡоу, йолҡоп алыу; **надёргать мно́го льна** күп итеп етен йолҡоу **2.** *перен.*, *разг.* унан-бынан (белер-белмәҫ) йолҡоп (сүпләп) алыу; **надёргать цита́т** цитаталарҙы унан-бынан сүпләп алыу

**НАДЁРГИВАТЬ I** *несов. см.* **надёргать**

**НАДЁРГИВАТЬ II** *несов. см.* **надёрнуть**

**НАДЁРГИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **надёргивать** I

**НАДЁРГИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **надёргивать** II

**НАДЕРЗИ́ТЬ** *сов. кому*; *разг.* ҡаты (тупаҫ, насар) һүҙҙәр әйтеп ташлау; **надерзи́ть от возмуще́ния** асыуҙан ҡаты һүҙҙәр әйтеп ташлау

**НАДЁРНУТЬ** *сов. что*; *разг.* (етеҙ генә) тартып ябыу (кейеү); **надёрнуть на себя́ одея́ло** одеялды үҙеңә тартып ябыу; **надёрнуть сапоги́** итекте етеҙ генә кейеү

**НАДЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** кейеү, кейҙереү; **наде́ть пальто́** пальто кейеү; **наде́ть очки́** күҙлек кейеү; **наде́ть чехо́л на дива́н** диванға чехол кейҙереү **2.** (*прикрепить*) тағыу, ҡаҙау, эләктереү; **наде́ть серёжки** алҡа тағыу; **наде́ть червяка́ на крючо́к** ҡармаҡҡа селәүсен эләктереү ♦ **наде́ть (на себя́) ма́ску** битлек кейеү, ике йөҙләләнеү; **наде́ть (себе́) хому́т на ше́ю** ауырлыҡты үҙ елкәңә алыу, үҙ елкәңә ҡамыт кейҙереү

**НАДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* кейелеү; **сапоги́ легко́ наде́лись** итек еңел кейелде

**НАДЕ́ЯТЬСЯ** *несов.* **1.** *на что* (*рассчитывать*) ышаныу, өмөт итеү, өмөтләнеү; **наде́яться на покрови́тельство ста́рших** ололарҙың яҡлауына ышаныу **2.** *на кого-что* (*полагаться*) ышаныу, таяныу; **наде́яться на дру́га** дуҫыңа ышаныу ♦ **как на ка́менную го́ру наде́яться** ныҡ ышаныу

**НАДЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое ер өҫтөндәге, ер өҫтө ...ы; **надзе́мная часть расте́ний** үҫемлектәрҙең ер өҫтөндәге өлөшө

**НАДЗИРА́ТЕЛЬ** *м* и **НАДЗИРА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* һаҡсы, надзиратель; **тюре́мный надзира́тель** төрмә һаҡсыһы

**НАДЗИРА́ТЬ** *несов. за кем-чем* күҙәтеү, күҙәтеп (ҡарап, тикшереп) тороу; **надзира́ть за поря́дком в рабо́те** эш тәртибен күҙәтеү

**НАДЗО́Р** *м* **1.** *см.* **надзира́ть**; **надзо́р за заключёнными** тотҡондарҙы күҙәтеү **2.** (группа надзирающих лиц) күҙәтеү, надзор; **санита́рный надзо́р** санитария күҙәтеүе ♦ **прокуро́рский надзо́р** прокурор надзоры; **суде́бный надзо́р** суд надзоры

**НАДЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* надзор ...ы; **надзо́рные о́рганы суда́** судтың надзор органдары

**НАДИВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*обычно с отриц. или со словами "не могу", "не может"*) һоҡланыу; **не могу́ надиви́ться** һоҡланып туя алмайым

**НАДКА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **надколо́ть**

**НАДКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **надколо́ться 2.** *страд. от* **надка́лывать**

**НАДКЛА́ССОВОСТЬ** *ж* синыфтарға бәйләнмәгәнлек, синыфтан тыш тороу; **надкла́ссовость воспита́ния** тәрбиәнең синыфтарға бәйләнмәгәнлеге

**НАДКЛА́ССОВЫЙ,** -ая, -ое синыфтарға бәйләнмәгән, синыфтан тыш, синфи мәнфәғәттәрҙән өҫтөн торған; **надкла́ссовое о́бщество** синыфтарға бәйләнмәгән йәмғиәт

**НАДКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **надкле́ить**

**НАДКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* өҫтәп (ялғап) йәбештереү, йәбештереп ҡуйыу (оҙонайтыу); **надкле́ить поло́ску бума́ги** ҡағыҙ өҫтәп йәбештереү

**НАДКЛЮ́ВЬЕ** *с*; *зоол.* суҡыштың өҫкө өлөшө

**НАДКЛЮЧИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое умрау өҫтө ...ы, умрау өҫтө(ндәге); **надключи́чная впа́дина** умрау өҫтө соҡоро

**НАДКО́ЖИЦА** *ж*; *бот.* тиресә өҫтө ярыһы (*үҫемлектәрҙә*)

**НАДКО́Л** *м* **1.** *см.* **надколо́ть 2.** (*надколотое место*) ярыҡ, ярылған (сатнаған) урын; **заби́ть клин в надко́л бревна́** бүрәнә ярығына шына ҡағыу

**НАДКОЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое тубыҡ ...ы, тубыҡ (теҙ) өҫтө; **надколе́нная кость** тубыҡ һөйәге

**НАДКОЛО́ТЬ** *сов. что* **1.** (*расщепить*) ярыу, яра биреп ҡуйыу, сатнатыу; **надколо́ть бревно́** бүрәнәне ярыу **2.** (*проколоть*) тишкеләп (сәнскеләп) сығыу; **надколо́ть огурцы́ пе́ред засо́лкой** ҡыярҙы тоҙлар алдынан сәнскеләп сығыу

**НАДКОЛО́ТЬСЯ** *сов.* аҙ ғына ярылыу, ярыла төшөү, сатнау; **оре́х надколо́лся** сәтләүек ярыла төшкән

**НАДКО́СТНИЦА** *ж*; *анат.* һөйәк ярыһы; **воспале́ние надко́стницы** һөйәк ярыһы шешеүе

**НАДКО́СТНЫЙ,** -ая, -ое һөйәк өҫтө ...ы, һөйәк өҫтөндәге; **надко́стная плёнка** һөйәк өҫтөндәге яры

**НАДКРЫ́ЛЬЯ** *мн.* (*ед.* **надкры́лье** *с*) өҫкө ҡанат, өҫтәге ҡаты ҡанаттар (*ҡуңыҙҙа һ.б. ярыҡанатлыларҙа*); **надкры́лья жука́** ҡуңыҙҙың өҫкө ҡаты ҡанаттары

**НАДКУ́С** *м* **1.** *см.* **надкуси́ть 2.** (*надкушенное место*) тешләп алынған урын, тешләнгән урын (ер); **надку́с на я́блоке** алмалағы тешләнгән урын

**НАДКУСИ́ТЬ** *сов. что* ситен тешләп алыу, кимереү; **надкуси́ть я́блоко** алманы тешләп алыу

**НАДКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **надкуси́ть**

**НАДЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **надломи́ть**

**НАДЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **надломи́ться 2.** *страд. от* **надла́мывать**

**НАДЛЕЖА́ТЬ** *несов. кому-чему безл.*; *книжн.* тейеш, кәрәк; **вам надлежи́т сро́чно прибы́ть на рабо́ту** һеҙгә тиҙ генә эшкә килеп етергә кәрәк

**НАДЛЕЖА́ЩИЙ,** -ая, -ее *книжн.* тейешле, тейешенсә, кәрәгенсә, кәрәкле; **приня́ть надлежа́щие ме́ры** тейешле саралар күреү; **держа́ть себя́ надлежа́щим о́бразом** үҙеңде тейешенсә тотоу

**НАДЛО́М** *м* **1.** *см.* **надломи́ть**, **надломи́ться**; **надло́м с тре́ском** шартлап һыныу **2.** (*надломленное место*) сатнаған (кителгән, һынған) урын; **надло́м ве́тки** ботаҡтың һынған урыны **3.** *перен.* төшөнкөлөк, рухһыҙлыҡ, ҡаҡшағанлыҡ; **в душе́ зре́ет глубо́кий надло́м** күңелдә тәрән төшөнкөлөк тыуа

**НАДЛОМИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* сатнатыу, китеү, һындырыу, һындыра яҙыу (төшөү); **надломи́ть па́лку** таяҡты һындырыу; **надломи́ть кость** һөйәкте сатнатыу **2.** *перен.* (*ослабить*) ҡаҡшатыу, көсөн (хәлен) бөтөрөү; **го́ре его́ надломи́ло** ҡайғы-хәсрәт уны ҡаҡшатты

**НАДЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һыныу, сатнау, кителеү; **труба́ надломи́лась** торба һынған; **зуб надломи́лся** теш кителгән **2.** *перен.* (*ослабеть*) биртенеү, ҡаҡшау; **здоро́вье надломи́лось** сәләмәтлек ҡаҡшаны

**НАДЛО́МЛЕННОСТЬ** *ж* төшөнкөлөк, ҡаҡшағанлыҡ; **душе́вная надло́мленность** күңел төшөнкөлөгө; **надло́мленность здоро́вья** сәләмәтлектең ҡаҡшауы

**НАДЛО́МЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **надломи́ть 2.** *прил.*; *перен.* рухһыҙ, күңелһеҙ, төшөнкө рухлы, ҡаҡшаған; **надло́мленный челове́к** төшөнкө рухлы кеше

**НАДМЕ́ННОСТЬ** *ж* тәкәбберлек, һауалылыҡ, эрелек; **надме́нность взгля́да** ҡараштың тәкәбберлеге; **проявля́ть надме́нность** тәкәбберлек күрһәтеү

**НАДМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое тәкәббер, һауалы, эре; **надме́нный вид** тәкәббер ҡиәфәт

**НАДМОГИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡәбер ...ы, ҡәбер өҫтө ...ы; **надмоги́льный холм** ҡәбер өҫтө ҡалҡыулығы; **надмоги́льная плита́** ҡәбер ташы

**НА́ДО I** *в знач. сказ., безл., обычно с неопр.* кәрәк; **на́до собира́ться в путь** юлға йыйынырға кәрәк; **мне не на́до помо́щников** миңә ярҙамсылар кәрәкмәй ♦ **на́до ду́мать (полага́ть)**: 1) *в знач. вводн. сл.* (*вероятно, по-видимому*) булһа кәрәк, шикелле, буғай, ахырыһы, моғайын; 2) (*конечно*) эйе, дөрөҫ, шулай; **на́до и честь знать** саманы ла белергә кәрәк; **что на́до** *в знач. сказ.*; *прост.* бына тигән, бик яҡшы, бик һәйбәт

**НАДО II** *предлог см.* **над**

**НАДО...** *приставка см.* **над...**

**НАДО́БЛАЧНЫЙ,** -ая, -ое болот өҫтө ...ы, болот(тар) өҫтөндәге; **надо́блачные слои́ атмосфе́ры** атмосфераның болот өҫтө ҡатламдары

**НА́ДОБНОСТЬ** *ж* кәрәклек, мохтажлыҡ, мохтаж булыу, хәжәт, ихтыяж; **в слу́чае на́добности** кәрәк булған саҡта; **име́ть на́добность** *в чём-л. берәй нәмәгә* мохтаж булыу; **нет на́добности** *в чём-л.* хәжәте юҡ

**НАДОЕДА́ТЬ** *несов. см.* **надое́сть**

**НАДОЕ́ДЛИВОСТЬ** *ж* ялыҡтырғыс (ялҡытҡыс) булыу, теңкәгә тейеүсәнлек; **надое́дливость его́ поведе́ния** уның тәртибенең ялыҡтырғыслығы

**НАДОЕ́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое ялыҡтырғыс, ялҡытҡыс, йөҙәткес, еләткес, теңкә ҡороҡос, тәҡәт(те) ҡороҡос, биҙрәткес, биҙҙергес; **надое́дливый челове́к** ялыҡтырғыс кеше; **надое́дливый дождь** ялҡытҡыс ямғыр; **надое́дливая про́сьба** теңкә ҡороҡос үтенес

**НАДОЕ́СТЬ** *сов. кому-чему* йөҙәтеү, биҙрәтеү, биҙҙереү, туйҙырыу, ялҡытыу, туйҙырып (интектереп, ялҡытып) бөтөрөү, теңкәгә тейеү, тәҡәтте ҡоротоу; **надое́сть про́сьбами** үтенестәр менән теңкәгә тейеү; **надое́ло мне молча́ть** өндәшмәү мине ялҡытты

**НАДОИ́ТЬ** *сов. что, чего* һауып алыу; **надои́ть ведро́ молока́** бер күнәк һөт һауып алыу

**НАДО́Й** *м*; *с.-х.* һауым; **ежедне́вный надо́й молока́** һөттөң көндәлек һауымы

**НАДОКО́ННЫЙ,** -ая, -ое тәҙрә өҫтө ...ы, тәҙрә өҫтөндәге; **надоко́нный карни́з** тәҙрә өҫтөндәге кәрниз

**НА́ДОЛБА** *ж* бүкән, бағана (*ергә ҡаҙып ултыртылған ҡыҫҡа бағана*) **2.** *обычно мн.* **на́долбы** *воен.* (*заграждение*) ҡойма, кәртә (*ҡыҫҡа бағаналар менән уратылған*); **грани́тные на́долбы** гранит ҡойма

**НАДОЛБИ́ТЬ** *сов. что, чего* соҡоп яһау (яһап ҡуйыу); **надолби́ть сква́жин** соҡоп тишектәр яһау

**НАДО́ЛГО** *нареч.* оҙаҡҡа, күпкә; **он уе́хал надо́лго** ул оҙаҡҡа китте

**НАДО́МНИК** *м* и **НАДО́МНИЦА** *ж* өйҙә эшләүсе (*предприятие, артель һ.б. биргән эште өйҙә башҡарыусы*)

**НАДО́МНЫЙ,** -ая, -ое өйҙә башҡарылған; **надо́мная рабо́та** өйҙә башҡарылған эш

**НАДОРВА́ТЬ** *сов. что* **1.** бер аҙ йыртыу, йырта төшөү, ситен йыртыу, йырта биреп ҡуйыу; **надорва́ть паке́т** пакетты йырта биреп ҡуйыу **2.** *перен.* ҡаҡшатыу, имгәтеү, эшлектән сығарыу, бөтөрөү; **надорва́ть го́лос** тауышты бөтөрөү; **надорва́ть здоро́вье** сәләмәтлекте ҡаҡшатыу; **надорва́ть си́лы** хәлдән тайыу ♦ **надорва́ть живо́т (живо́тики) со́ смеху (от хо́хота)** *прост.* эс ҡатып көлөү, эс ҡатҡансы көлөү

**НАДОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бер аҙ йыртылыу, йыртыла төшөү; **мешо́к надорва́лся сбо́ку** тоҡтоң сите йыртыла төшкән **2.** *разг.* имгәнеү, биртенеү, (эскә) зыян килтереү; **надорва́ться, поднима́я тя́жести** ауыр күтәреп имгәнеү **3.** *перен.* хәлһеҙләнеү, ныҡ арыу, үтә йонсоу; **надорва́ться на тяжёлой рабо́те** ауыр эштән ныҡ арыу

**НАДОУ́МИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* кәңәш биреү, аҡыл биреү; **он надоу́мил обрати́ться к вам** ул һеҙгә мөрәжәғәт итергә кәңәш бирҙе

**НАДПИ́Л** *м* **1.** *см.* **надпили́ть 2.** (*надпиленное место*) бысылған урын; **надпи́л на де́реве** ағастағы бысылған урын

**НАДПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **надпили́ть**

**НАДПИЛИ́ТЬ** *сов. что* бер аҙ бысып ҡуйыу, быса биреп ҡуйыу; **надпили́ть бревно́** бүрәнәне өҫтән бер аҙ бысып ҡуйыу

**НАДПИ́ЛКА** *ж см.* **надпили́ть**; **надпи́лка доски́** таҡтаны быса төшөү (биреү)

**НАДПИСА́ТЬ** *сов. что* **1.** өҫтөнә (артына, тышына) яҙып ҡуйыу (яҙыу), (берәй нәмә) яҙыу; **надписа́ть фотогра́фию** фотография артына яҙыу; **надписа́ть кни́гу** китапҡа берәй нәмә яҙыу **2.** (*выше написанного ранее*) яҙылған юл өҫтөнә яҙыу; **надписа́ть над строко́й не́сколько слов** яҙылған юл өҫтөнә бер нисә һүҙ яҙыу

**НА́ДПИСЬ** *ж* яҙыу, яҙма; **на́дпись на фотогра́фии** фотография артындағы яҙыу; **на́дписи на ска́лах** ҡаялағы яҙмалар

**НАДПОРО́ТЬ** *сов. что* (тегелгәндә) бер аҙ һүтеү, һүтә биреү; **надпоро́ть подкла́дку** эслекте бер аҙ һүтеү

**НАДПО́ЧВЕННЫЙ,** -ая, -ое тупраҡ (ер) өҫтө ...ы, тупраҡ (ер) өҫтөндәге; **надпо́чвенные во́ды** ер өҫтөндәге һыуҙар

**НАДПО́ЧЕЧНИКИ** *мн.* (*ед.* **надпо́чечник** *м*); *анат.* бөйөр өҫтө биҙҙәре

**НАДПО́ЧЕЧНЫЙ,** -ая, -ое бөйөр өҫтө ...ы; **надпо́чечные же́лезы** бөйөр өҫтө биҙҙәре

**НАДРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **надра́ить**

**НАДРА́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **надра́ивать**

**НАДРА́ИТЬ** *сов. что*; *мор.* ышҡып (ялтыратҡансы) таҙартыу (йыуыу), ялтыратыу; **надра́ить па́лубу** палубаны ышҡып ялтыратҡансы йыуыу

**НАДРА́ТЬ** *сов. что, чего* һуйып (ҡайыҙлап) алыу, һыҙырып алыу; **надра́ть мно́го коры́** күп

итеп ағас ҡабығы һыҙырып алыу ♦ **надра́ть у́ши** *кому* ҡолағын бороу

**НАДРЕ́З** *м* **1.** *см.* **надре́зать** — **надреза́ть** **2.** (*надрезанное место*) киҫек, киҫелгән урын; **попере́чный надре́з** арҡыры киҫек

**НАДРЕ́ЗАТЬ** *сов. что* (бер аҙ) ҡырҡа (киҫә) биреп ҡуйыу; **надре́зать карто́н** ҡатырғаны ҡырҡа биреп ҡуйыу

**НАДРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **надре́зать**

**НАДРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **надре́зать**

**НАДРЕ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **надре́зывать**

**НАДРЕССИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* өйрәтеү, күнектереү (*хайуанды*); **надрессирова́ть соба́ку** этте өйрәтеү

**НАДРУ́Б** *м* **1.** *см.* **надруби́ть**; **надру́б бревна́** бүрәнәне бер аҙ киртеү **2.** киртеп алынған урын, уйым; **надру́б на поле́не** утын ағасындағы уйым

**НАДРУБА́ТЬ** *несов. см.* **надруби́ть**

**НАДРУБА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **надруба́ть**

**НАДРУБИ́ТЬ** *сов. что* (бер аҙ) киртеү (сабыу), саба (киртә) биреп ҡуйыу; **надруби́ть кору́** ағас ҡабығын киртә биреп ҡуйыу

**НАДРУГА́ТЕЛЬСТВО** *с* мыҫҡыл, мыҫҡыл итеү, мәсхәрә, мәсхәрә итеү; **огради́ть себя́ от надруга́тельства** үҙеңде мыҫҡылдан һаҡлап алып ҡалыу

**НАДРУГА́ТЬСЯ** *сов. над кем-чем* мыҫҡыл итеү, мыҫҡыллау, мәсхәрәләү, хурлау; **надруга́ться над сла́бым** көсһеҙҙе мыҫҡыллау

**НАДРЫ́В** *м* **1.** *см.* **надорва́ть** 1; **надры́в конве́рта** конверттың ситен бер аҙ йыртыу **2.** йыртылған урын, йыртыҡ; **надры́в на листе́** ҡағыҙ битендәге йыртыҡ **3.** *перен.* төшөнкөлөк, һынылыш, көсөргәнеш; **ка́шлять с надры́вом** көсөргәнеш менән йүткереү; **душе́вный надры́в** рухи һынылыш ♦ **говори́ть с надры́вом** ҡыҙып (ярһып) һөйләү

**НАДРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **надорва́ть** ♦ **надрыва́ть гло́тку (го́рло)** *прост.* боғаҙ йыртыу (ярыу), аҡырып һөйләү (йырлау)

**НАДРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **надорва́ться** 1; **2.** *над чем* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* көсәнеп эшләү, бөтә көстө һалып (ҡуйып) эшләү (тырышыу), хәлдән тайыу, имгәнеү, бик ҡаты ҡыҫҡырыу; **надрыва́ться над сти́ркой** кер йыуып хәлдән тайыу; **надрыва́ться, поднима́я тя́жести** ауыр күтәреп имгәнеү **3.** *от чего* яфаланыу, ғазапланыу; **надрыва́ться от чу́вства раска́яния** үкенеү тойғоһонан ғазапланыу **4.** *страд. от* **надрыва́ть** ♦ **се́рдце (душа́) надрыва́ется** йөрәк (күңел) әрней (өҙөлә)

**НАДРЫ́ВИСТЫЙ,** -ая, -ое артыҡ (үтә) көсөргәнешле, әсе, ҡаты, ярһыулы; **надры́вистый ка́шель** ҡаты йүткереү, быума йүтәл

**НАДРЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое әрнеүле, әсенеүле, йөрәк әрнеткес, үҙәк өҙгөс; **надры́вная пе́сня** йөрәк әрнеткес йыр

**НАДСА́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **надса́дный**

**НАДСА́ДНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡаты; **надса́дный ка́шель** ҡаты йүтәл

**НАДСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **надсе́чь**

**НАДСЕ́ЧКА** *ж* **1.** *см.* **надсе́чь**; **надсе́чка бревна́** бүрәнәне киртә биреп ҡуйыу **2.** (*зарубка*) киртек, тамға; **надсе́чка на ка́мне** таштағы тамға

**НАДСЕ́ЧЬ** *сов. что* (бер аҙ) киртеү, киртеп ҡуйыу; **надсе́чь топоро́м де́рево** ағасты балта менән киртеү

**НАДСМА́ТРИВАТЬ** *несов. за* (*над*) *кем-чем* ҡарау, тикшереү, күҙәтеү, ҡарап (тикшереп, күҙәтеп) тороу; **надсма́тривать за рабо́той** эшләгәнде күҙәтеп тороу

**НАДСМО́ТР** *м* өҫтән тикшереп (ҡарап, күҙәтеп) тороу; **надсмо́тр за поря́дком** тәртипте өҫтән тикшереп тороу

**НАДСМО́ТРЩИК** *м* ҡараусы, баҡтансы (*тикшереп-күҙәтеп тороусы*, *күҙәтеп эшләтеүсе*); **путево́й надсмо́трщик** юл ҡараусы

**НАДСТА́ВИТЬ** *сов. что* өҫтәп (ялғап) оҙонайтыу; **надста́вить рукава́** еңдәрҙе ялғап оҙонайтыу

**НАДСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **надста́вить**

**НАДСТАВНО́Й,** -ая, -ое **1.** ялғанған, ялғанмалы; **надставны́е рукава́** ялғанған еңдәр **2.** ялғап ҡуйыла торған, ялғап ҡуйыу өсөн; **надставна́я доска́ стола́** өҫтәлгә ялғап ҡуйыла торған таҡта

**НАДСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **надстро́ить**

**НАДСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **надстра́ивать**

**НАДСТРО́ЕЧНЫЙ,** -ая, -ое *полит.* өҫҡорма ...ы, өҫҡормаға хас (булған); **надстро́ечные явле́ния** өҫҡормаға хас күренештәр

**НАДСТРО́ИТЬ** *сов. что* өҫтәп төҙөү (ҡороу), бейегәйтеп (бейек итеп) төҙөү; **надстро́ить дом** өйҙө бейегәйтеп төҙөү

**НАДСТРО́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **надстро́ить**; **надстро́йка но́вых этаже́й к до́му** өйгә яңы ҡаттар өҫтәп төҙөү **2.** өҫкө ҡоролма; **надстро́йки корабля́** караптың өҫкө ҡоролмалары **3.** *полит.* өҫҡорма

**НАДСТРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (яҙылған, яҙма) юл өҫтөндәге; **надстро́чные зна́ки** юл өҫтөндәге билдәләр

**НАДТЕСА́ТЬ** *сов. что* (өҫтән) юныу (юнып алыу); **надтеса́ть бревно́** бүрәнәне өҫтән юнып алыу

**НАДТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **надтеса́ть**

**НАДТРЕ́СНУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** сатнаған, аҙ ғына ярыҡ; **надтре́снутый стака́н** сатнаған стакан **2.** *перен.* (*о звуке, голосе*) ҡалтыраған, ҡарлыҡҡан; **надтре́снутый го́лос** ҡарлыҡҡан тауыш

**НАДТРЕ́СНУТЬ** *сов.* сатнау, аҙ ғына (сатнау) ярылыу; **стекло́ надтре́снуло** быяла сатнаны

**НАДУВА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* алдау ...ы, хәйләләү ...ы, һемәйтеү ...ы; **надува́тельские приёмы** алдау юлдары

**НАДУВА́ТЕЛЬСТВО** *с*; *разг.* алдаҡсылыҡ, алдыҡ, алдашыу, ялғанлау; **пойти́ на надува́тельство** алдашыуға барыу

**НАДУВА́ТЬ** *несов. см.* **наду́ть**

**НАДУВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наду́ться** 1; **2.** *страд. от* **надува́ть** 1, 2

**НАДУ́ВКА** *ж см.* **наду́ть** — **надува́ть** 1; **наду́вка шин** шиндарҙы өрҙөрөп тултырыу

**НАДУВНО́Й,** -ая, -ое өрөлмәле, өрөп (өрҙөрөп) тултырмалы (ҡабартмалы), өрөп (өрҙөрөп) тултырылған; **надувно́й матра́с** өрөп тултырмалы матрас

**НАДУ́МАННОСТЬ** *ж* яһалмалыҡ, уйҙырмалылыҡ; **наду́манность сюже́та** сюжеттың яһалмалылығы

**НАДУ́МАННЫЙ,** -ая, -ое уйҙырма, уйланма, уйлап сығарылған, яһалма; **наду́манный о́браз** уйлап сығарылған образ

**НАДУ́МАТЬ** *сов. что, с неопр.*; *разг.* уйға килеү, уйлау, уйлап ҡарарға килеү, -маҡсы/-мәксе булыу, уйлап табыу; **наду́мать заня́ться спо́ртом** спорт менән шөғөлләнмәксе булыу; **наду́мать уе́хать** китергә уйлау

**НАДУ́МАТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* туйғансы уйлау, уйланыу, күп уйлау; **наду́маться о предстоя́щей рабо́те** алдағы эш тураһында күп уйланыу **2.** (*1 и 2 л. не употр.*) *разг.* башҡа килеү; **э́та мысль наду́малась не сра́зу** был уй бик тиҙ генә башҡа килмәне

**НАДУ́МЫВАТЬ** *несов. см.* **наду́мать**

**НАДУРА́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы шаярыу (ҡотороу, тилереү); **де́ти вдо́воль надура́чились** балалар туйғансы шаярҙы

**НАДУ́ТОСТЬ** *ж* **1.** тәкәбберлек, һауалылыҡ, тәкәббер (эре, һауалы) булыу **2.** күпертелгәнлек, күпертелгән (ҡабартылған) булыу (*һүҙ, стиль, телмәр*); **наду́тость сти́ля** стилдең күпертелгән булыуы

**НАДУ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **наду́ть** **2.** *прил.* ҡабарған, бүрткән, күпкән; **наду́тые жи́лы рук** ҡабарған ҡул тамырҙары **3.** *прил.*; *перен., разг.* (*высокомерный*) эре, һауалы, тәкәббер; **наду́тая осо́ба** тәкәббер кеше **4.** *прил.*; *перен., разг.* (*высокопарный*) күпертелгән, ҡабартылған (*һүҙ, телмәр, стиль һ.б.*) **5.** *прил.*; *перен., разг.* (*обиженный, сердитый, угрюмый*) турһайған, асыулы, ҡараңғы сырайлы

**НАДУ́ТЬ** *сов. что* **1.** өрөп (өрҙөрөп) тултырыу, өрөп (һауа тултырып) ҡабартыу; **наду́ть мяч** тупты өрөп тултырыу **2.** *что, чего безл.* өрөп туҙҙырыу (килтереү, индереү, ҡундырыу, тулыу); **ве́тром наду́ло пы́ли** ел менән туҙан тулған **3.** *кому-чему безл.*; *разг.* ел бәрелеү (бәреү, һуғыу, ҡағылыу); **наду́ло в у́хо** ҡолаҡҡа ел һуҡҡан **4.** *кого*; *прост.* алдау, төп башына ултыртыу, һемәйтеү; **он меня́ наду́л** ул мине алданы ♦ **наду́ть гу́бы** үпкәләү, ирен турһайтыу

**НАДУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о мяче*) ҡабарыу; (*о парусе*) киреү; **мяч наду́лся** туп ҡабарҙы; **паруса́ наду́лись** елкәндәр кирелде **2.** *перен., разг.* (*обидеться*) үпкәләү, турһайыу, (үпкәләп) сырай һытыу **3.** *перен., разг.* тәкәбберләнеү, эреләнеү, кәпәренеү; **от чрезме́рных похва́л он наду́лся** артыҡ маҡтауҙан ул кәпәренде ♦ **как мышь на крупу́ наду́лся** *кто* үпкәләгән, турһайған

**НАДУШИ́ТЬ** *сов. кого-что* хушбуй һөртөү (бөркөү)

**НАДУШИ́ТЬСЯ** *сов.* хушбуй һөртөнөү

**НАДХВО́СТЬЕ** *с*; *зоол.* ҡойроҡ өҫтө (*коштарҙа*); **надхво́стье у зя́блика** ҡыҙылтүштең ҡойроҡ өҫтө

**НАДШИВА́ТЬ** *несов. см.* **надши́ть**

**НАДШИВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **надшива́ть**

**НАДШИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **надши́ть**; **надши́вка воротника́** яғаны ялғап тегеп оҙонайтыу **2.** (*надставленное место*) ялғанған урын, ялғау; **надши́вка у брюк** салбарҙың ялғауы

**НАДШИ́ТЬ** *сов. что* ялғап тегеү (тегеп оҙонайтыу); **надши́ть кусо́к мате́рии к пла́тью** күлдәкте туҡыма киҫәге менән ялғап оҙонайтыу

**НАДЪ...** *приставка см.* **над...**

**НАДЫМИ́ТЬ** *сов. чем* и *без доп.* төтәү, төтөн сығарыу (тултырыу); **печь надыми́ла** мейес төтәгән; **в ко́мнате надыми́ли табако́м** бүлмәгә тәмәке төтөнө тулған

**НАДЫША́ТЬ** *сов.* **1.** тын (һулыш) менән йылытыу (йылытып иретеү); **в ко́мнате надыша́ли** бүлмәне тын менән йылытҡандар **2.** *на что*; *разг.* тын менән (өрөп) быуландырыу (парландырыу, иретеү); **надыша́ть на око́нное стекло́** тәҙрә быялаһын өрөп быуландырыу

**НАДЫША́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы һулау, күп һулау; **надыша́ться лесны́м во́здухом** урман һауаһын туйғансы һулау ♦ **не навы́шится (не мо́жет надыша́ться)** *на кого* ҡарап (күреп) туя алмай

**НАЕДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **нае́сться**

**НАЕДИНЕ́** *нареч.* **1.** икәүҙән-икәү генә, аулаҡта; **поговори́ть наедине́** икәүҙән-икәү генә һөйләшеү **2.** (*обычно со словами "с собой", "с самим собой"*) бер үҙе, япа-яңғыҙ; **оста́ться наедине́ с сами́м собо́й** япа-яңғыҙ ҡалыу

**НАЕ́ЗД** *м* **1.** *см.* **нае́хать** 1; **нае́зд маши́ны на тротуа́р** машинаның тротуарға барып менеүе **2.** *в знач. нареч.* **нае́здом**, **нае́здами** үтешләй, үткән-һүткәндә; **у дру́га он быва́л нае́здами** ул дуҫында үтешләй генә була ине **3.** *уст.* (*кавалерийский набег*) атлы ғәскәр һөжүме, сапҡын

**НАЕ́ЗДИТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*какое-л. количество времени или расстояние*) йөрөү, уҙыу, үтеү; **на ста́рой маши́не мно́го не нае́здишь** иҫке машинала әллә ни оҙаҡ йөрөп



20 зак. 2.0084.05

булмай **2.** *что* (*укатать, уплотнить*) юл һалыу, (күп йөрөп) юлды таҡырайтыу (шымартыу); **маши́ны нае́здили доро́гу** машиналар юлды таҡырайтып бөткән **3.** *кого-что*; *спец.* (*выездить молодую лошадь*) йөрөргә өйрәтеү; **нае́здить молодо́го жеребца́** йәш айғырҙы йөрөргә өйрәтеү

**НАЕ́ЗДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (бик күп) йөрөү, йөрөп туйыу; **нае́здиться на велосипе́де** велосипедта туйғансы йөрөү

**НАЕ́ЗДНИК** *м* **1.** һыбайлы; **цирково́й нае́здник** цирк һыбайлыһы **2.** ат өйрәтеүсе, атта йөрөргә өйрәтеүсе, жокей; **гла́вный нае́здник коню́шни** атлыҡсаның төп ат өйрәтеүсеһе **3.** *зоол.* яйҙаҡ

**НАЕ́ЗДНИЦА** *ж см.* **нае́здник** 1, 2

**НАЕЗЖА́ТЬ I** *несов. см.* **нае́здить** 2, 3

**НАЕЗЖА́ТЬ II** *несов.* **1.** *см.* **нае́хать** **2.** *разг.* килеү (*аҙ ғына ваҡытҡа*), килеп киткеләү, килгеләп йөрөү

**НАЕ́ЗЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **нае́здить**; **нае́зженный рыса́к** өйрәтелгән юртаҡ **2.** *прил.* ҡаты, таҡыр, тигеҙ, шыма (*юл*); **нае́зженная доро́га** таҡыр юл

**НАЁМ** *м см.* **наня́ть**; **наём рабо́чих** эшселәр яллау; **рабо́та по на́йму** ялланып эшләү

**НАЁМНИК** *м* **1.** *уст.* (*наёмный работник*) ялсы, ялланып эшләүсе **2.** (*наёмный солдат*) ялланма ғәскәр (һалдат) **3.** *перен.* (*наймит*) һатлыҡ йән, ялсы

**НАЁМНИЦА** *ж см.* **наёмник** 1

**НАЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ялланма, ялланған, ялланыу ...ы; **наёмный рабо́чий** ялланма эшсе; **наёмная цена́** ялланыу хаҡы; **наёмная а́рмия** ялланма армия **2.** (*отдаваемый или взятый внаём*) файҙаланып торорға алынған (бирелгән); **наёмная да́ча** файҙаланып торорға алынған дача **3.** һатлыҡ, аҡсаға ялланған; **наёмный уби́йца** аҡсаға ялланған үлтереүсе

**НАЁМЩИК** *м* эшселәр яллаусы

**НАЕ́СТЬСЯ** *сов.* туйғансы ашау, ашап туйыу; **нае́сться хле́ба с ма́слом** туйғансы май яғылған икмәк ашау

**НАЕ́ХАТЬ** *сов.* **1.** *на кого-что* өҫтөнә барып (килеп) менеү, тапау, барып (килеп) бәрелеү, төртөлөү, (өҫтөнә) барып сығыу; **маши́на нае́хала на газо́н** машина газонға килеп менде; **нае́хать на ху́тор** утарға барып сығыу **2.** *разг.* (*приехать*; *обычно в большом количестве*) күп килеү, килеп төшөү (тулыу); **к пра́зднику нае́хало мно́го госте́й** байрамға бик күп ҡунаҡ килеп төштө

**НАЖА́ЛОВАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ялыу биреү, зарланыу; **рабо́чие нажа́ловались на управля́ющего** эшселәр управляющий өҫтөнән ялыу биргән

**НАЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **нажа́рить**

**НАЖА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нажа́риться** **2.** *страд. от* **нажа́ривать**

**НАЖА́РИТЬ** *сов. что, чего* (күпмелер) ҡыҙҙырыу, ҡурыу; **нажа́рить карто́шки** картуф ҡыҙҙырыу

**НАЖА́ТИЕ** *с см.* **нажа́ть** I; **нажа́тие рычага́** рычагка баҫыу

**НАЖА́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* баҫыу; **нажа́ть на кно́пку** кнопкаға баҫыу **2.** *что* һығып алыу (сығарыу); **нажа́ть тома́тного со́ка** томат һутын һығып алыу **3.** *на кого-что*; *перен.*, *прост.* баҫым яһау, ҡыҫыу; **нажа́ть на строи́телей** төҙөүселәргә баҫым яһау **4.** *на что*; *перен.*, *прост.* ҡыҙыуыраҡ тотоноу, (эште) ҡыҙыулатыу; **нажа́ть на рабо́ту** эшкә ҡыҙыуыраҡ тотоноу

**НАЖА́ТЬ II** *сов. что, чего* урыу, урып алыу; **нажа́ть со́тни це́нтнеров ржи** йөҙәрләгән центнер арыш урыу

**НАЖДА́К** *м* наждак (*минерал*)

**НАЖДА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое наждак ...ы, наждаклы; **нажда́чное месторожде́ние** наждак ятҡылығы; **нажда́чная бума́га** наждаклы ҡағыҙ ♦ **нажда́чный ка́мень** наждак ташы, ҡом ҡайраҡ

**НАЖЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что, чего*; *разг.* яндырыу, үртәү (*бер ни тиклем*), яндырып әҙерләү; **наже́чь древе́сного угля́** ағас күмере үртәп алыу; **наже́чь за́ зиму мно́го дров** ҡыш сыҡҡансы байтаҡ утын яндырыу **2.** *что*; *разг.* (*нагреть, накалить*) яндырыу, бешереү, эҫетеү, ҡыҙҙырыу; **со́лнце нажгло́ спи́ну** арҡаны ҡояш яндырған **3.** *спец.* ҡыҙҙырып (яндырып) тамға һалыу; **наже́чь тавро́** ҡыҙҙырып тамға һалыу (*малға*)

**НАЖЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* (*сильно загореть на солнце, перегреться*) (ҡояшта) бешеү, (бик ныҡ) ҡыҙыу, яныу **2.** *на чём*; *перен.*, *прост.* (*потерпеть материальный ущерб от обмана*) яныу; **наже́чься на поку́пке** нәмә һатып алғанда яныу

**НАЖИ́ВА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **нажи́ть** 1; **нажи́ва де́нег** аҡса табыу **2.** анһат (еңел) табыш (файҙа); **пого́ня за нажи́вой** еңел табыш артынан ҡыуыу

**НАЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **нажи́ть**

**НАЖИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нажи́ться** **2.** *страд. от* **нажива́ть**

**НАЖИВИ́ТЬ** *сов. что*; *рыб.* емләү, ем ҡуйыу (ҡатыу); **наживи́ть крючо́к червяко́м** ҡармаҡты селәүсен менән емләү

**НАЖИ́ВКА** *ж*; *рыб.* ем, алдатҡыс; **нажи́вка для ры́бы** балыҡ еме, балыҡ өсөн ем

**НАЖИВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **наживи́ть**

**НАЖИВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **наживля́ть**

**НАЖИВНО́Й I:** **де́ло наживно́е** булдырып була торған эш, табыла (ирешеп була) торған нәмә

**НАЖИВНО́Й II,** -ая, -ое (*употребляемый в качестве наживки*) ем ҡуйылған, ем итеп (емгә) ҡуйыла торған; **наживна́я ры́ба** емгә ҡуйыла торған балыҡ, емлек

**НАЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **наже́чь**

**НАЖИ́М** *м* **1.** *см.* **нажима́ть** 1; **нажи́м на рукоя́тку молотка́** сүкеш һабына баҫыу **2.** (*натиск*) һөжүм; **вра́жеский нажи́м** дошман һөжүме **3.** *спец.* ҡыҫҡыс, ҡыҫтырғыс; **винтообра́зный нажи́м** бормалы ҡыҫтырғыс **4.** *в знач. нареч.* **с нажи́мом** баҫып, баҫым яһап; **без нажи́ма** баҫмайынса, баҫым яһамайынса; **писа́ть с нажи́мом** баҫып яҙыу

**НАЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **нажа́ть**

**НАЖИМНО́Й** и **НАЖИ́МНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ҡыҫыу ...ы, ҡыҫҡыс; **нажимно́й рыча́г** ҡыҫыу рычагы

**НАЖИ́Н** *м*; *с.-х.* төшөм, урым (*игенгә ҡарата*)

**НАЖИНА́ТЬ** *несов. см.* **нажа́ть** II

**НАЖИТО́Й,** -ая, -ое *разг.* (эшләп) тапҡан, тапҡан-таянған; **нажито́е бога́тство** эшләп тапҡан-таянған байлыҡ

**НАЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** табыу, булдырыу, йыйыу; **нажи́ть всё свои́м трудо́м** бөтәһен үҙ көсөң менән табыу **2.** *кого-что, кого-чего*; *разг.* (*приобрести что-л. неприятное*) булдырыу, эләктереү, тарыу, юлығыу; **нажи́ть себе́ врага́** үҙеңә дошман булдырыу; **нажи́ть себе́ боле́знь** ауырыу эләктереү; **нажи́ть неприя́тность** насар хәлгә юлығыу

**НАЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*обогатиться*) байыу, байлыҡ туплау, аҡса йыйыу, байығыу; **нажи́ться на прода́же ору́жия** ҡорал һатып байыу **2.** *разг.* (*долго прожить где-л., вдоволь пожить*) оҙаҡ йәшәп китеү, оҙаҡ тороу (*ҡайҙа ла булһа*); **на чужби́не до́лго не наживёшься** сит ерҙәрҙә оҙаҡ йәшәп булмай

**НАЖУЖЖА́ТЬ** *сов.*; *разг.* (*наговорить*) артыҡ күп һөйләү, бушты (юкты, юк-бар) һөйләү, ғәйбәт һөйләү; **нажужжа́ть в у́ши** юк-бар(ҙы) һөйләп ялҡытыу

**НАЗА́ВТРА** *нареч.*; *разг.* иртәгәһенә, иртәгеһенә, иртәгәһе көнгә, икенсе көнгә

**НАЗА́Д** *нареч.* **1.** артҡа, артҡа табан; **огляну́ться наза́д** артҡа (боролоп) ҡарау **2.** (*обратно*) кире, кире ҡайтарып; **верну́ться наза́д** кире (әйләнеп) ҡайтыу; **взять своё сло́во наза́д** һүҙеңде кире алыу **3.** (*раньше*) элек; **год (тому́) наза́д** бер йыл элек

**НАЗАЛИЗА́ЦИЯ** *ж*; *лингв.* танаулашыу, танау аша әйтелеү (*өнгә ҡарата*)

**НАЗАЛИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое *лингв.* **1.** *прич. от* **назализова́ть 2.** *прил.* танаулашҡан, танау ...ы; **назализо́ванные зву́ки** танаулашҡан өндәр

**НАЗАЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. что*; *лингв.* танаулаштырыу

**НАЗАЛИЗОВА́ТЬСЯ** *сов., несов.*; *лингв.* танаулашыу

**НАЗВА́НИВАТЬ** *несов.*; *разг.* өҙлөкһөҙ (туҡтауһыҙ) шылтыратыу; **назва́нивать по телефо́ну** бер туҡтауһыҙ шылтыратыу

**НАЗВА́НИЕ** *с* **1.** исем, атама; **назва́ние у́лицы** урам исеме **2.** *спец.* (*отдельное издание*) китап; **в библиоте́ке 100 ты́сяч назва́ний** китапханала йөҙ мең китап бар ♦ **одно́ (то́лько) назва́ние** ҡоро исеме генә (*исеменә, атамаһына тура килмәгән, йәки элекке дәрәжәһен (сифатын) юғалтҡан нәмәләр тураһында әйтелә*)

**НА́ЗВАННЫЙ I,** -ая, -ое *прич. от* **назва́ть** I; **на́званные вы́ше имена́** юғарыла әйтелгән исемдәр

**НА́ЗВАННЫЙ II,** -ая, -ое *прич. от* **назва́ть** II; **на́званные го́сти** саҡырылған ҡунаҡтар

**НАЗВА́НЫЙ,** -ая, -ое *уст.* ҡиәмәтлек, үкел, морондоҡ ♦ **назва́ный оте́ц** ҡиәмәтлек атай; **назва́ная мать** үкел (ҡиәмәтлек) әсәй; **назва́ный сын** ҡиәмәтлек ул; **назва́ная дочь** ҡиәмәтлек ҡыҙ

**НАЗВА́ТЬ I** *сов. кого-что* **1.** (*дать имя, название, прозвище*) атау, исемләү, исем ҡушыу (биреү), ҡушамат биреү (тағыу) **2.** (*охарактеризовать*) әйтеү, баһалау; **назва́ть его́ спосо́бным** уны һәләтле тип әйтеү **3.** (*сказав, объявить*) һанап сығыу, (атап) күрһәтеү, әйтеү; **назва́ть чле́нов коми́ссии** комиссия ағзаларын һанап сығыу

**НАЗВА́ТЬ II** *сов. кого-что* саҡырыу, йыйыу (*гәҙәттә, күп итеп*); **назва́ть по́лный дом госте́й** өй тултырып ҡунаҡ саҡырыу

**НАЗВА́ТЬСЯ I** *сов. кем-чем* и *без доп.* үҙенең исемен әйтеү, үҙенең кем булыуын танытыу (белдереү, әйтеү); **он назва́лся строи́телем** ул үҙен төҙөүсе тип танытты; **прише́дший назва́лся** килгән кеше исемен әйтте

**НАЗВА́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* (*напроситься*) көсләп тағылыу, ризалыҡ алыу, -тырыу/-тереү; **назва́ться в го́сти** үҙен ҡунаҡҡа саҡырттырыу

**НАЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ер өҫтө ...ы, ер өҫтөндәге, ер ...ы; **назе́мные постро́йки** ер өҫтө ҡаралтылары; **назе́мные живо́тные** ер хайуандары; **назе́мные расте́ния** ер үҫемлектәре **2.** (ҡоро) ер; **назе́мные войска́** ҡоро ер ғәскәре

**НА́ЗЕМЬ** *нареч.* ергә, иҙәнгә; **вали́ть на́земь** ергә йығыу

**НАЗИДА́НИЕ** *с*; *книжн.* өгөт, нәсихәт, вәғәз, һабаҡ, ғибрәт; **не нужда́ться в назида́ниях** өгөт-нәсихәткә мохтаж булмау; **слова́, ска́занные в назида́ние пото́мкам** киләсәк быуынға һабаҡ итеп әйтелгән һүҙҙәр

**НАЗИДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* өгөтләү ...ы, өгөтләй торған, өгөт бирә торған, өгөт-нәсихәт, нәсихәтле, һабаҡ булырлыҡ, ғибрәтле; **говори́ть назида́тельным то́ном** өгөт-нәсихәт тоны менән һөйләү; **назида́тельный приме́р** һабаҡ булырлыҡ өлгө

**НАЗЛО́** и *разг.* **НА́ЗЛО** *нареч.* юрамал, үс итеп, асыуға тейеп, асыу итеп; **вре́мя сего́дня, как назло́, тя́нется до́лго** ваҡыт бөгөн, үс иткәндәй, оҙаҡ үтә

**НАЗНАЧА́ТЬ** *несов. см* **назна́чить**

**НАЗНАЧА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **назнача́ть**

**НАЗНАЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **назна́чить**; **назначе́ние на рабо́ту** эшкә тәғәйенләү **2.** билдәләнеү, тәғәйенләнеү; **получи́ть но́вое назначе́ние** яңы эшкә билдәләнеү **3.** (*цель, задача*) төп функция, бурыс, маҡсат, вазифа; **смысл и назначе́ние жи́зни** йәшәүҙең мәғәнәһе һәм маҡсаты; **отря́д осо́бого назначе́ния** махсус вазифа йөкмәтелгән отряд; **испо́льзовать по назначе́нию** тәғәйенләнеше буйынса файҙаланыу

**НАЗНА́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* билдәләү, күрһәтеү, тәғәйенләү, ҡуйыу, биреү; **назна́чить день отъе́зда** китер көндө билдәләү; **назна́чить уча́сток для застро́йки до́ма** өй һалыу өсөн урын билдәләү; **назна́чить его́ заве́дующим отде́лом** уны бүлек мөдире итеп тәғәйенләү (ҡуйыу); **назна́чить пе́нсию** пенсия билдәләү; **назна́чить це́ну** хаҡ ҡуйыу

**НАЗО́ЙЛИВЫЙ,** -ая, -ое бәйләнсек, йөҙәткес, ялыҡтырғыс, ялҡыткыс, теңкә ҡороткос, маҙа китәргес; **назо́йливый челове́к** теңкә ҡороткос кеше

**НАЗРЕВА́НИЕ** *с см.* **назрева́ть**; **назрева́ние плодо́в** емештәрҙең өлгөрөүе

**НАЗРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **назре́ть**

**НАЗРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*стать спелым*) өлгөрөү, бешеү; **ви́шня назре́ла** сейә бешкән **2.** (*о нарыве*) тулышыу, тулышып етеү **3.** *перен.* (*приблизиться, стать неизбежным*) яҡынлашыу, етешеү, етеү, ҡотолғоһоҙ булыу; **назре́ло вре́мя для перегово́ров** һөйләшеү өсөн ваҡыт килеп етте

**НАЗУБО́К** *нареч.*; *разг.* ятҡа, яттан, ятлап (алыу); **знать уста́в назубо́к** уставты яттан белеү

**НАЗЫВА́НИЕ** *с см.* **называ́ть** I; **называ́ние ве́щи** әйберҙең исемен атау

**НАЗЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **назва́ть** I ♦ **называ́ть бе́лое чёрным** аҡты ҡара тип әйтеү; **называ́ть ве́щи свои́ми имена́ми** хәҡиҡәтте йәшермәйенсә әйтеү, дөрөҫөн (тураһын) һөйләү

**НАЗЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **назва́ть** II

**НАЗЫВА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** (*носить имя, называться*) аталыу, исемләнеү, исем йөрөтөү; **э́то явле́ние по-друго́му называ́ется** был күренеш икенсе төрлө атала **2.** *страд. от* **называ́ть** I ♦ **что называ́ется** *в знач. вводн. сл.* (*как принято говорить*) әйтергә кәрәк, тип әйтергә кәрәк

**НАЗЫВА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **назва́ться** II **2.** *страд. от* **называ́ть** II

**НАЗЫВНО́Й:** **назывно́е предложе́ние** *грам.* атама һөйләм

**НАИ...** *приставка*; *сифат һәм рәүештәргә ялғанып, артыҡлыҡ һәм ҡайһы бер осраҡтарҙа сағыштырыу дәрәжәләре яһай*; *тәржемәлә "иң" тигән мәғәнәне аңлата, мәҫ.*, **наилу́чший** иң яҡшы; **наивы́годнейший** иң файҙалы, иң ҡулайлы

**НАИ́Б** *м* наиб (*ҡайһы бер мосолман илдәрендә башлыҡ йәки руханиҙың урынбаҫары, ярҙамсыһы*)

**НАИБО́ЛЕЕ** *нареч.* **1.** иң, айырыуса, ныҡ, бигерәк тә; **э́тот ме́тод наибо́лее подхо́дит для уро́ка** был ысул дәрес өсөн бигерәк тә тура килә **2.** (*в сочет. с прил. и нареч. образует превосх. ст.*) иң ныҡ, бигерәк тә; **наибо́лее кре́пкая семья́** иң ныҡ ғаилә

**НАИБО́ЛЬШИЙ,** -ая, -ее иң ҙур (күп, киң, эре); **наибо́льшая ширина́ реки́** йылғаның иң киң урыны

**НАИ́ВНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* бер ҡатлыланыу, бер ҡатлы булып күренергә тырышыу, бер ҡатлылыҡ күрһәтеп маташыу; **лицеме́рно наи́вничать** бер ҡатлы булып ҡыланыу

**НАИ́ВНОСТЬ** *ж* бер ҡатлылыҡ, хәйләһеҙлек, эскерһеҙлек; **проявля́ть наи́вность** бер ҡатлылыҡ күрһәтеү

**НАИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое бер ҡатлы, хәйләһеҙ, эскерһеҙ; **наи́вный челове́к** бер ҡатлы кеше; **наи́вный вопро́с** бер ҡатлы һорау; **наи́вная улы́бка** хәйләһеҙ йылмайыу

**НАИВЫ́СШИЙ,** -ая, -ое иң юғары, иң ҙур, иң бейек; **наивы́сшие достиже́ния** иң юғары ҡаҙаныштар

**НАИ́ГРАННОСТЬ** *ж* яһалмалылыҡ; **наи́гранность в поведе́нии** ҡылыҡтағы яһалмалылыҡ

**НАИ́ГРАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **наигра́ть** **2.** *прил.* яһалма, ялған; **наи́гранный смех** яһалма көлөү

**НАИГРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего*; *разг.* уйнау, башҡарыу; **наигра́ть мно́го пе́сенных мело́дий** бик күп йырҙарҙың көйөн башҡарыу **2.** (*сыграть для звукозаписи*) көй яҙҙырыу; **наигра́ть вальс на пласти́нку** пластинкаға вальс көйөн яҙҙырыу

**НАИГРА́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) уйнау, уйнап туйыу; **де́ти наигра́лись** балалар уйнап туйҙы

**НАИ́ГРЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **наигра́ть** **2.** *что и без доп.* әкрен генә көй башҡарыу (уйнау) (*музыка ҡоралында*); **наи́грывать стари́нные мело́дии** әкрен генә боронғо көйҙәр уйнау

**НА́ИГРЫШ** *м* **1.** көй; **плясовы́е на́игрыши** бейеү көйҙәре **2.** (*искусственность в актёрской игре*) яһалмалылыҡ

**НАИЗГОТО́ВЕ:** **держа́ть наизгото́ве** әҙер тотоу (*ғәҙәттә, мылтыҡ, пистолет һ.б. тураһында*)

**НАИЗНА́НКУ** *нареч.* тиҫкәре (һул) яғын (яғына); **наде́ть руба́шку наизна́нку** күлдәктең тиҫкәре яғын кейеү

**НАИЗУ́СТЬ** *нареч.* ятҡа, яттан, күңелдән; **чита́ть наизу́сть стихи́** яттан шиғыр уҡыу

**НАИЛУ́ЧШИЙ,** -ая, -ее иң шәп, иң яҡшы; **наилу́чший спо́соб обрабо́тки** иң шәп эшкәртеү ысулы

**НАИМЕ́НЕЕ** *нареч.* **1.** иң, иң аҙ, бик, бик аҙ, бөтәһенән дә аҙ, -һыҙыраҡ/-һеҙерәк, -һыҙ/-һеҙ, -һыҙы/-һеҙе; **наиме́нее подходи́ть** бик аҙ тап ки-

леү **2.** (*в сочет. с прил. и нареч. образует превосх. ст.*) иң, иң аҙ, бик, бик аҙ, бөтәһенән дә аҙ; **наиме́нее уда́чная глава́ кни́ги** китаптың иң уңышһыҙ бүлеге

**НАИМЕНОВА́НИЕ** *с* исем, исемлек, атама; **наименова́ние това́ров** тауарҙар исемлеге; **дать наименова́ние** атама биреү

**НАИМЕ́НЬШИЙ,** -ая, -ее иң аҙ (бәләкәй, ваҡ, ҡыҫҡа); **наиме́ньшие поте́ри** иң аҙ юғалтыуҙар; **наиме́ньший рост** иң ҡыҫҡа буй ♦ **по ли́нии (по пути́) наиме́ньшего сопротивле́ния** еңел юл менән, ҡаршылыҡһыҙ (ҡаршылығы аҙ булған) юл менән

**НА́ИСКОСЬ** и *разг.* **НАИСКОСО́К** *нареч.* ҡыялаш, ҡыя; **он живёт наискосо́к от нас** ул беҙгә ҡыялаш тора

**НАИХУ́ДШИЙ,** -ая, -ее иң насар, иң яман; **наиху́дший вариа́нт** иң насар вариант

**НАЙДЁНЫШ** *м*; *разг.* ташландыҡ (табылдыҡ) бала; **приюти́ть найдёныша** табылдыҡ баланы һыйындырыу

**НАЙМИ́Т** *м* **1.** ялсы; **держа́ть найми́тов в стра́хе** ялсыларҙы ҡурҡытып тотоу **2.** *кого-чего*; *пренебр.* һатлыҡ йән, һатылған кеше, ялсы

**НАЙТИ́ I** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* табыу, тип табыу, күреү, һиҙеү, һанау; **найти́ поте́рянную вещь** юғалған әйберҙе табыу; **найти́ спо́соб реше́ния зада́чи** мәсьәләне сисеү юлын табыу; **врач нашёл его́ вы́здоровевшим** врач уны сәләмәтләнгән тип тапты ♦ **найти́ себе́ смерть (моги́лу, коне́ц)** *где*; *высок.* үҙенең үлемен табыу; **найти́ о́бщий язы́к** уртаҡ тел табыу; **найти́ себя́** үҙ урыныңды табыу; **концо́в не найти́** осона сыға алмау, рәтен таба алмау

**НАЙТИ́ II** *сов.* **1.** *на кого-что* (*надвинуться*) барып бәрелеү (төртөлөү, менеү); **найти́ на пень** түңгәккә барып бәрелеү; **теплохо́д нашёл на мель** теплоход һайға барып төртөлдө **2.** *на что* (*закрыть собой*) ҡаплау; **ту́ча нашла́ на со́лнце** ҡояшты болот ҡапланы **3.** (*собраться*) йыйылыу, килеп тулыу, тулыу; **нашло́ мно́го наро́ду** бик күп халыҡ йыйылған ♦ **нашла́ коса́ на ка́мень** ҡара-ҡаршы килеү (*караштар, характерҙар бәрелеше тураһында*); **стих нашёл** *на кого* кәйефе килде, теләге уянды, илһамланды; **нашла́ тоска́** хәсрәткә батты; **нашло́ чу́вство ра́дости** шатлыҡ хисе яулап алды; **что э́то на тебя́ нашло?** һиңә ни булды?

**НАЙТИ́СЬ** *сов.* **1.** (*отыскаться*) табылыу; **ключи́ нашли́сь** асҡыстар табылды **2.** (*не растеряться*) юғалмау, юғалып ҡалмау, аптырап тормау; **не найти́сь, что отве́тить** яуап бирә алмай юғалып ҡалыу

**НАКА́З** *м* **1.** (*документ*) теләк, наказ, талап; **нака́зы избира́телей** һайлаусылар(ҙың) наказдары **2.** *уст.*, *разг.* (*наставление*) талап, бойороҡ, кәңәш, өгөт-нәсихәт; **отцо́вский нака́з** атайҙың өгөт-нәсихәте

**НАКАЗА́НИЕ** *с* **1.** яза; **тяжёлое наказа́ние** ауыр (ҡаты) яза; **подве́ргнуть наказа́нию** язалау, язаға тарттырыу **2.** *разг.* бәлә; **э́то су́щее наказа́ние** бәләнең бәләһе булды был

**НАКАЗА́ТЬ** *сов. кого-что* язалау, яза биреү; **наказа́ть стро́го** ҡаты яза биреү

**НАКАЗУ́ЕМОСТЬ** *ж*; *юр.* яза бирерлек булыу

**НАКАЗУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *юр.* яза бирелә торған, язаларлыҡ; **наказу́емый посту́пок** язаларлыҡ ҡылыҡ

**НАКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **наказа́ть**

**НАКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нака́зывать**

**НАКА́Л** *м* **1.** *см.* **накали́ть**, **накали́ться** **2.** (*степень свечения*) ҡыҙыу, яҡтыртыу; **ла́мпочка гори́т по́лным нака́лом** лампочка ҡыҙып яна

**НАКАЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **накали́ть** **2.** *прил.* ҡырҡыулашҡан; **накалённая обстано́вка** ҡырҡыулашҡан хәл

**НАКА́ЛИВАНИЕ** *с см.* **нака́ливать**, **нака́ливаться**; **нака́ливание мета́лла** металл ҡыҙҙырыу ♦ **ла́мпа нака́ливания** ҡыҙҙырма электр лампаһы, үткәргесле лампа

**НАКА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **накали́ть**

**НАКА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** **накали́ться** **2.** *страд. от* **нака́ливать**

**НАКАЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (үтә, ныҡ) ҡыҙҙырыу; **накали́ть утю́г** үтек ҡыҙҙырыу **2.** *перен.* (*сделать крайне напряжённым*) ҡырҡыулаштырыу, киҫкенләштереү

**НАКАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** үтә (ныҡ) ҡыҙыу; **желе́зо накали́лось** тимер ныҡ ҡыҙҙы **2.** *перен.* ҡырҡыулашыу, киҫкенләшеү; **междунаро́дная обстано́вка накали́лась** халыҡ-ара хәл ҡырҡыулашты

**НАКА́ЛЫВАНИЕ** *с см.* **нака́лывать** II

**НАКА́ЛЫВАТЬ I** *несов. см.* **наколо́ть** I

**НАКА́ЛЫВАТЬ II** *несов. см.* **наколо́ть** II

**НАКА́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наколо́ться** **2.** *страд. от* **нака́лывать** II

**НАКАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **накали́ть**

**НАКАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накали́ться** **2.** *страд. от* **накаля́ть**

**НАКАНУ́НЕ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* көн элгәре, элек, алдан; **вспо́мнить то, что бы́ло накану́не** элек булғанды иҫкә төшөрөү **2.** *предлог с род. п.* (*перед чем-л.*) алдынан; **накану́не пра́здника** байрам алдынан; **накану́не отъе́зда** китер алдынан

**НАКА́ПАТЬ** *сов.* **1.** *что* тамыҙыу, тамыҙып һалыу, тамыҙып бысратыу; **нака́пать лека́рства в рю́мку** рюмкаға дарыу тамыҙыу; **нака́пать на ска́терть варе́нье** ашъяулыҡҡа ҡайнатма тамыҙып бысратыу **2.** *на кого* и *без доп.*; *перен.*, *прост.* (*оговорить кого-л.*) яла яғыу, кеше

өҫтөнән һөйләү; **нака́пать на подру́гу** әхирәт(ең) өҫтөнән һөйләү

**НАКА́ПЛИВАТЬ** *несов. см.* **накопи́ть**

**НАКА́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накопи́ться 2.** *страд. от* **нака́пливать**

**НАКА́ПЫВАТЬ I** *несов. см.* **нака́пать** 1

**НАКА́ПЫВАТЬ II** *несов. см.* **накопа́ть**

**НАКА́РКАТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* (*карканьем наслать беду*) (бәләгә) ҡарҡылдау, алдан юрап бәлә килтереү

**НАКА́Т** *м* **1.** *см.* **наката́ть** 1, 4, **накати́ть** 1; **нака́т брёвен** бүрәнәләр(ҙе) тәгәрәтеү **2.** *воен.* накат (*атҡандан һуң ҡоралдың элекке хәленә ҡайтыуы*) **3.** (*настил*) түшәмә, түшәлмә (*бүрәнәләр, ҡалын таҡталар*); **блинда́ж с двойны́м нака́том** ике ҡат бүрәнә түшәмәле блиндаж **4.** *что* тәгәрәтеп буяу менән ҡаплау, тәгәрәтеп һырлау (ялтыратыу)

**НАКА́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **наката́ть 2.** *прил.* тигеҙ, шыма, таҡыр; **нака́танная доро́га** таҡыр юл

**НАКАТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (күп итеп) тәгәрәтеү, тәгәрәтеп килтереп ҡуйыу; **наката́ть брёвен** бүрәнәләр тәгәрәтеү **2.** әүәләү, баҫыу, әүәләп яһау; **наката́ть ша́риков из гли́ны** балсыҡтан әүәләп тумалаҡтар яһау; **наката́ть не́сколько пар ва́ленок** бер нисә пар быйма баҫыу **3.** (*укатать дорогу*) тигеҙләү, шымартыу, юл һалыу; **наката́ть доро́гу по лу́гу** болон аша күп йөрөп, юл һалыу **4.** *спец.* накат яһау, буяу менән ҡаплау (һырлау); **наката́ть клеймо́** тамғаны буяу менән ҡаплау **5.** *что, чего*; *прост.* тиҙ генә яҙып (һыҙғылап) ташлау; **наката́ть письмо́** тиҙ генә хат яҙып ташлау

**НАКАТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы шыуыу, шыуып туйыу (*саңғыла, конькиҙа*), туйғансы (ултырып) йөрөү (*атҡа, машинаға һ.б.*); **наката́ться на лы́жах** саңғыла йөрөп туйыу; **наката́ться на ло́шади** атта туйғансы йөрөү

**НАКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, на что* (*надвинуть на что-л.*) тәгәрәтеп килтереп ҡуйыу, тәгәрәтеп индереү (мендереү); **накати́ть бо́чку на платфо́рму** мискәне тәгәрәтеп платформаға мендереү **2.** *на кого-что*; *разг.* (*надвинуться, наехать*) бәрелеү, төртөлөү, һуғылыу, ҡаплап китеү; **накати́ть в темноте́ на столб** ҡараңғыла бағанаға төртөлөү; **волна́ накати́ла на бе́рег** тулҡын ярға барып бәрелде ♦ **стих накати́л** кәйефе килде, илһамланды

**НАКАТИ́ТЬСЯ** *сов. см.* **накати́ть** 2

**НАКА́ТКА I** *ж* **1.** *см.* **наката́ть** 3, 4; **нака́тка доро́ги** күп йөрөп юлды шымартыу; **нака́тка бума́ги** ҡағыҙҙы буяу менән һырлау **2.** *спец.* накатка (*буяу менән ҡаплау, һырлау һ.б. өсөн ҡулланыла торған әйләнмәле валик, ролик, цилиндр һ.б. формаһындағы ҡуллан-ма*) **3.** *спец.* урау машинаһы (*туҡымаларҙы, ҡағыҙҙы һ.б.*)

**НАКА́ТКА II** *ж см.* **накати́ть** 1; **нака́тка бо́чек на теле́гу** мискәләрҙе арбаға тәгәрәтеп мендереү

**НАКА́ТНИК** *м* **1.** *спец.* өрлөк, түшәмлек (*бүрәнәләр, ҡалын таҡталар*) **2.** *хәрби.* накатник (*атҡандан һуң элекке хәленә ҡайтарыу ҡорамалы*); **пружи́нный нака́тник** пружиналы накатник

**НАКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** түшәлгән (*ҡалын таҡталар*); **нака́тный пол** (таҡта) түшәлгән иҙән **2.** урау ...ы; **нака́тная маши́на** урау машинаһы

**НАКА́ТОМ** *нареч.* әйләндереп, тәгәрәтеп; **грузи́ть бо́чки нака́том** мискәләрҙе тәгәрәтеп тейәү

**НАКА́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **наката́ть** 1—4

**НАКА́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **накати́ть**

**НАКА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **нака́тывать** I

**НАКА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **накати́ться 2.** *страд. от* **нака́тывать** II

**НАКАЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* һурҙырыу, һурҙырып сығарыу (*насос менән*); **накача́ть воды́ из коло́дца** ҡойонан һыу һурҙырыу **2.** *что* өрҙөрөп тултырыу (*насос менән*); **накача́ть балло́н** баллонды өрҙөрөп тултырыу ♦ **не́ было печа́ли, (так) че́рти накача́ли** ауыртмаған башҡа тимер таяҡ

**НАКАЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) бәүелеү, бәүелеп туйыу; **де́ти вдо́воль накача́лись** балалар туйғансы бәүелде

**НАКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **накача́ть**

**НАКА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нака́чивать**

**НАКА́ЧКА** *ж* **1.** *см.* **накача́ть** — **нака́чивать**; **нака́чка воды́** һыу һурҙырыу; **нака́чка ши́ны** шинды өрҙөрөп тултырыу **2.** *перен., прост.* өгөт-нәсихәт, шелтә; **получи́ть нака́чку** шелтә алыу

**НАКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **накоси́ть**

**НАКВА́СИТЬ** *сов. что, чего* әсетеү, әсетеп ҡуйыу, тоҙлау, тоҙлап ҡуйыу; **наква́сить капу́сты** кәбеҫтә тоҙлау

**НАКИДА́ТЬ** *сов. что, чего* (күп итеп) ташлау, ырғытыу, атыу, атып бәреү, ташлап (ырғытып) тултырыу; **накида́ть на́ пол бума́ги** иҙәнгә күп итеп ҡағыҙ ташлау; **накида́ть в мешо́к карто́шки** тоҡҡа картуф тултырыу

**НАКИ́ДКА** *ж* **1.** накидка (*еңһеҙ өҫ кейеме*); **мехова́я наки́дка** мех накидка **2.** (*покрывало*) япма, мендәр ябыуы; **кружевна́я наки́дка** селтәр япма **3.** (*прибавка*) өҫтәмә, өҫтәү (*гәҙиттә, хаҡҡа*); **наки́дка на це́ну** хаҡҡа өҫтәмә (түләү)

**НАКИДНО́Й,** -ая, -ое **1.** иңбашҡа (яурынға) һала торған; **накидно́й плащ** иңбашҡа һала торған плащ **2.** *разг.* өҫтәмә ...ы, өҫтәү ...ы; **накидно́й проце́нт** өҫтәмә процент; **накидна́я цена́** өҫтәү хаҡы

**НАКИ́ДЫВАТЬ I** *несов. см.* **накида́ть**

**НАКИ́ДЫВАТЬ II** *несов. см.* **наки́нуть**

**НАКИ́ДЫВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **наки́дывать** I

**НАКИ́ДЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **наки́нуться 2.** *страд. от* **наки́дывать** II

**НАКИ́НУТЬ** *сов. что* **1.** (өҫтөнә) ябыу, һалыу; **наки́нуть пухо́вый плато́к на пле́чи** иңбашҡа мамыҡ шәл һалыу **2.** *разг.* (*прибавить*) өҫтәү; **наки́нуть рубль** бер һум өҫтәү

**НАКИ́НУТЬСЯ** *сов. см.* **набро́ситься**

**НАКИПА́ТЬ** *несов. см.* **накипе́ть**

**НАКИПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*о пене*) ҡайнап күбек йыйылыу (күтәрелеү); (*о накипи*) юшҡын ултырыу **2.** *перен.* (*о переживаниях*) ҡайнау, йыйылыу, тулыу, ҡабарыу, ташыу; **на душе́ у меня́ накипе́ло** эсемдә ут ҡайнаны

**НА́КИПЬ** *ж* **1.** (*пена, грязь*) күбек, турта; **снять на́кипь с бульо́на** һурпаның туртаһын һөҙөп алыу **2.** ҡомаҡ, юшҡын; **очи́стить ча́йник от на́кипи** сәйнүктең юшҡынын таҙартыу

**НАКИПЯТИ́ТЬ** *сов. что, чего* ҡайнатыу, ҡайнатып алыу (ҡуйыу); **накипяти́ть во́ду** һыу ҡайнатып ҡуйыу; **накипяти́ть молока́** һөт ҡайнатып алыу

**НАКЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **накла́дывать** 1; **2.** (*в причёске*) парик, яһалма сәс; **на голове́ у неё накла́дка из чёрных воло́с** уның башында яһалма ҡара сәс **3.** *тех.* ишек биге планкаһы

**НАКЛА́ДНО** *в знач. сказ.*; *прост.* табышһыҙ, төшөмһөҙ, файҙаһыҙ, бик ҡиммәткә төшөү; **э́то ему́ бу́дет накла́дно** был уның өсөн ҡиммәткә төшәсәк

**НАКЛАДНО́Й,** -ая, -ое **1.** өҫтән (беркетеп) ҡуйылған, (өҫтән) ябыла торған; **накладны́е ста́вни** өҫтән (тыштан) ҡуйылған тәҙрә ҡапҡастары **2.** (өҫтөнән) ялатылған; **ло́жки накладно́го серебра́** көмөш ялатылған ҡалаҡтар **3.** (*искусственный*) яһалма, йәбештерелгән; **накладны́е усы́** йәбештерелгән мыйыҡ **4.** *в знач. сущ.* **накладна́я** *ж* (*документ*) накладной ♦ **накладны́е расхо́ды** өҫтәмә сығымдар

**НАКЛА́ДЫВАНИЕ** *с см.* **накла́дывать**; **накла́дывание компре́сса** боҫлама ҡуйыу; **накла́дывание ги́пса** гипс һалыу

**НАКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **наложи́ть**

**НАКЛА́ДЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **накла́дывать**

**НАКЛА́СТЬ** *сов. что, чего*; *прост. см.* **наложи́ть** 5

**НАКЛЁВ** *м*; *спец. см.* **наклю́нуть 2.** себеш моронлаған тишек (*йоморҡалағы*)

**НАКЛЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего*; *разг.* (бер ни тиклем) суҡыу, сүпләү, суҡып ашау; **ку́рица наклева́ла горсть зерна́** тауыҡ бер ус ем сүпләне **2.** (*клюя, повредить*) суҡып (ашап) зарарлау; **наклева́ть ви́шню** сейәне суҡыу

**НАКЛЕВЕТА́ТЬ** *сов. на кого-что* яла яғыу; **наклевета́ть на безви́нного** ғәйепһеҙ кешегә яла яғыу

**НАКЛЁВЫВАТЬ I** *несов. см.* **наклева́ть** 2

**НАКЛЁВЫВАТЬ II** *несов. см.* **наклю́нуть**

**НАКЛЕ́ИВАНИЕ** *с см.* **накле́ивать**; **накле́ивание ма́рки** марка йәбештереү

**НАКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **накле́ить**

**НАКЛЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накле́иться 2.** *страд. от* **накле́ивать**

**НАКЛЕ́ИТЬ** *сов.* **1.** *что* йәбештереү; **накле́ить афи́ши на забо́рах** ҡоймаларға афиша(лар) йәбештереү **2.** *что, чего* (*изготовить*) йәбештереп яһау; **накле́ить ёлочных игру́шек** йәбештереп шыршы уйынсыҡтары яһау

**НАКЛЕ́ИТЬСЯ** *сов.* йәбешеү; **карти́на хорошо́ накле́илась** һүрәт һәйбәт йәбешкән

**НАКЛЕ́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **накле́ить 2.** йәбештереп ҡуйылған нәмә (*этикетка, ҡағыҙ һ.б.*); **буты́лка с накле́йкой** этикеткалы шешә **3.** *театр.* яһалма һаҡал (*мыйыҡ, ҡаштар һ.б.*)

**НАКЛЕЙНО́Й,** -ая, -ое йәбештерелгән, йәбештерелә торған; **наклейны́е усы́** йәбештерелгән мыйыҡ

**НАКЛЕПА́ТЬ** *сов.* сигәләү, сейнәү, сүкеп ялғау (йәбештереү); **наклепа́ть сталь** ҡорос сигәләү

**НАКЛЁПКА** *ж* **1.** *см.* **наклепа́ть 2.** (*то, что наклёпано*) сигәләгән урын; **наклёпка на болте́** болттың сейнәлгән урыны (ере)

**НАКЛЁПЫВАНИЕ** *с см.* **наклёпывать**

**НАКЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **наклепа́ть**

**НАКЛЁПЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наклёпывать**

**НАКЛИ́КАТЬ** *сов. что, чего*; *прост.* алдан юрап, башҡа бәлә килтереү

**НАКЛИКА́ТЬ** *несов. см.* **накли́кать**

**НАКЛИ́КИВАТЬ** *несов. см.* **накли́кать**

**НАКЛО́Н** *м* **1.** *см.* **наклони́ть, наклони́ться 2.** һөҙәк ер, иңкеүлек; **е́хать по накло́ну горы́** тауҙың һөҙәк еренән барыу **3.** ауышлыҡ, ауыш булыу; **накло́н букв** хәрефтәрҙең ауышлығы ♦ **в накло́н** эйелеп, эйенке тороп; **пили́ть де́рево в накло́н** ағасты эйелеп бысыу

**НАКЛОНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **наклони́ть** — **наклоня́ть, наклони́ться** — **наклоня́ться 2.** *грам.* һөйкәлеш; **наклоне́ния глаго́ла** ҡылым һөйкәлештәре

**НАКЛОНИ́ТЬ** *сов. что* эйеү, эйелтеү, иңкәйтеү, бөгөү; **наклони́ть бо́чку** мискәне иңкәйтеү; **наклони́ть де́рево** ағасты эйеү

**НАКЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* эйелеү, иңкәйеү, бөгөлөү, һалынып төшөү; **наклони́ться над крова́ткой** карауат өҫтөнә эйелеү; **ве́тки наклони́лись** ботаҡтар эйелеп төшкән

**НАКЛО́ННОСТЬ** *ж* **1.** (*склонность*) һәүәҫлек, әүәҫлек; **накло́нность к му́зыке** музыкаға

һәүәҫлек **2.** *обычно мн.* **наклóнности** (*привычки*) ғәҙәт

**НАКЛÓННЫЙ,** -ая, -ое эйеңке, һарҡыу, ауынҡы, ауыш, ҡыя, ҡыйыш, ҡырын; **наклóнные дóски** ҡыя такталар ♦ **наклóнная плóскость** *спец.* ҡыя яҫылыҡ; **катúться по наклóнной плóскости** әхлаҡи яҡтан боҙолоу, түбәнгә тәгәрәү

**НАКЛОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **наклонúть**

**НАКЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наклонúться** **2.** *страд. от* **наклоня́ть**

**НАКЛЮ́НУТЬ** *сов. что* моронлау, моронлай башлау; **наклю́нутое яйцó** моронлаған йомортҡа

**НАКЛЮ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** *см.* **наклю́нуть** **2.** *перен.* (*о почках*) асыла биреү (башлау); **на берёзах наклю́нулись пóчки** ҡайын бөрөләре асыла башлаған

**НАКОВА́ЛЬНЯ** *ж* **1.** (*железная подставка для ковки металла*) һандал, түш; **отбивáть косу́ на наковáльне** салғыны түшкә һалып сүкеү (тапау) **2.** *анат.* һандал һөйәк (*урта ҡолаҡта*)

**НАКОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡыҙҙырып сүкеү; **наковáть ось** күсәрҙе ҡыҙҙырып сүкеү **2.** *что* сүкеп яһау (*күпмелер дана*); **наковáть мнóго подкóв** күп итеп сүкеп даға яһау

**НАКÓВЫВАТЬ** *несов. см.* **наковáть**

**НАКОВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **наковыря́ть**

**НАКОВЫРЯ́ТЬ** *сов. что, чего* ҡаҙып (аҡтарып, соҡоп) алыу; **наковыря́ть глúны** балсыҡ соҡоп алыу

**НАКÓЖНИК** *м* ҡорсаңғы микробы (*хайуандар тиреһендә*)

**НАКÓЖНЫЙ,** -ая, -ое тире ...ы; **накóжная сыпь** тире сабыртмаһы

**НАКОКСОВА́ТЬ** *сов. что, чего* кокслау, кокслап әҙерләү (әҙерләп ҡуйыу); **накоксовáть мнóго угля́** күп итеп күмер кокслап әҙерләү

**НАКОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **наколотúть**

**НАКОЛДОВА́ТЬ** *сов. что* сихырлау, өшкөрөү, сихыр көсө биреү; **наколдовáть вóду** һыуҙы өшкөрөү

**НАКОЛДÓВЫВАТЬ** *несов. см.* **наколдовáть**

**НАКОЛÉННИК** *м* тубыҡса (*тубыҡ һаҡлағыс*); **кóжаные наколéнники** күн тубыҡсалар

**НАКОЛÉННЫЙ,** -ая, -ое тубыҡ (өҫтө); **наколéнная повя́зка** тубыҡ бәйләүесе

**НАКÓЛКА** *ж* **1.** *см.* **накóлóть** II 2—4; **2.** (*украшение*) сәс биҙәүесе; **кружевнáя накóлка** селтәрҙән сәс биҙәүесе **3.** *прост. см.* **татуирóвка**

**НАКОЛОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* һуғыу, ҡағыу, һуғып (ҡағып) индереү (кейҙереү); **наколотúть óбруч на бóчку** мискәгә ҡоршау һуғыу; **наколотúть в стéну гвоздéй** стенаға ҡаҙаҡтар ҡағыу **2.** *что, чего; разг.* (*разбить*) ватыу; **наколотúть нечáянно посу́ды** яңылыш һауытһаба ватыу

**НАКОЛÓТЬ I** *сов. что, чего* ярыу, ярып ташлау (ҡуйыу); **наколóть дров** утын ярып ташлау

**НАКОЛÓТЬ II** *сов. что* **1.** сәнсеү, сәнселеү, ҡаҙау, ҡаҙалыу; **наколóть иглóлкой пáлец** бармаҡҡа энә ҡаҙалыу **2.** *на что* ҡаҙап (сәнсеп) ҡуйыу; **наколóть на шля́пу цветóк** эшләпәгә сәскә ҡаҙап ҡуйыу **3.** *что, чего* (сәнсеп) тишкеләп яһау (төшөрөү); **наколóть узóр** тишкеләп биҙәк төшөрөү **4.** *что* (*о плодах*) сәнскеләү, тишкеләү; **наколóть вúшню** сейәләрҙе тишкеләү **5.** *что, кого-чего* һуйыу, һуйып ҡуйыу; **наколóть гусéй** ҡаҙ һуйыу

**НАКОЛÓТЬСЯ** *сов.* сәнселеү, ҡаҙалыу; **наколóться на иглóлку** энәгә ҡаҙалыу

**НАКОМА́РНИК** *м* битлек (*серәкәй талауҙан һаҡланыу өсөн*); **волосянóй накомáрник** ҡылдан яһалған битлек

**НАКОНÉЦ** *нареч.* и *вводн. сл.* **1.** *нареч.* аҙаҡ килеп, ахырҙа, ахырында, һуңында, һуңынан; **он наконéц пóнял** ул ахырҙа аңланы **2.** *вводн. сл.* (*выражает нетерпение, недовольство и т.п.*) ниһайәт, ахыр сиктә, һис булмаһа (юғында), өҫтәүенә ♦ **наконéц(-то)!** ниһайәт!

**НАКОНÉЧНИК** *м* ос, баш, башаҡ; **наконéчник копья́** һөңгө осо; **наконéчник стрелы́** уҡ башағы

**НАКОПА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаҙыу, ҡаҙып ҡуйыу; **накопáть ям** соҡорҙар ҡаҙып ҡуйыу **2.** *чего* ҡаҙыу, ҡаҙып алыу; **накопáть картóфеля** картуф ҡаҙып алыу

**НАКОПИ́ТЬ** *сов. что; прям., перен.* йыйыу, туплау; **накопúть дéнег** аҡса йыйыу; **накопúть óпыт** тәжрибә туплау

**НАКОПИ́ТЬСЯ** *сов.; прям., перен.* йыйылыу, тупланыу, өйөлөү; **накопúлась ку́ча дел** тау кәҙәре эш йыйылған; **накопúлся достáточный óпыт** етерлек тәжрибә тупланды

**НАКОПЛÉНИЕ** *с* **1.** *см.* **накопúть, накопúться** **2.** *мн.* **накоплéния** (*сбережения*) туплanma, йыйылған аҡсалар; **накоплéния в бáнке** банкыла йыйылған аҡса

**НАКОПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **накопúть**

**НАКОПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накопúться** **2.** *страд. от* **накопля́ть**

**НАКОПТИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*начадить копотью*) төтәтеү, төтәп һөрөм сығарыу, һөрөмгә батырыу, ыҫлау; **лáмпа накоптúла** лампа төтәп һөрөм сығарҙы **2.** *что, чего* ыҫлау, ыҫлап ҡуйыу (*аҙыкты*); **накоптúть ры́бы** балыҡ ыҫлап ҡуйыу

**НАКОРМИ́ТЬ** *сов.* ашатыу, туйғансы ашатыу, ашатып туйҙырыу; (*младенца*) имеҙеү; **накормúть семью́** ғаиләне ашатыу ♦ **накормúть берёзовой кáшей** сыбыҡлау, ярыу, һуҡтырыу

**НАКОРЧЕВА́ТЬ** *сов. что, чего* аҡтарыу, ҡуптарыу, ҡуптарып (аҡтарып) сығарыу; **накорчевáть пней** төптәрҙе аҡтарып сығарыу

**НАКОРЧЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **накорчевáть**

**НАКÓС** *м; с.-х.* сабып алынған (сабылған) (*үлән, башаҡлылар һ.б.*); **пéрвый накóс клéвера** тәүге сабып алынған туҡранбаш

**НАКОСИ́ТЬ** *сов. что, чего* сабыу, сабып алыу; **накоси́ть травы́** үлән сабып алыу

**НАКО́СТНИЦА** *ж*; *вет.* һөйәк ороһо (*аттарҙа*)

**НАКО́СТНЫЙ,** -ая, -ое һөйәк өҫтө ...ы, һөйәк өҫтөндәге; **нако́стная о́пухоль** һөйәк өҫтөндәге шеш

**НА́КОСЬ** *нареч.*; *разг.* ҡыйыш, ҡыя; **ста́вить ступни́ на́кось** ҡыйыш баҫыу

**НАКРА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **накра́сть**

**НАКРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **накрои́ть**

**НАКРА́ПЫВАТЬ** *несов.* һибәләү, һибәләп яуыу (тороу); **стал накра́пывать дождь** ямғыр һибәләй башланы

**НАКРА́СИТЬ** *сов.* **1.** *что* ағыу, буяу; **накра́сить гу́бы** ирен буяу **2.** *что, чего* буяу, маныу, буяп сығыу; **накра́сить пря́жи** иләнгән епте буяу

**НАКРА́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* буяныу, һөртөнөү

**НАКРА́СТЬ** *сов. что, чего* урлау, урлап йыйыу

**НАКРАХМА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **накрахма́лить**

**НАКРАХМА́ЛИТЬ** *сов. что, чего* крахмаллау, ашлау, крахмаллап (ашлап) ҡуйыу; **накрахма́лить воротничо́к** яғаны крахмаллау

**НАКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **накра́сить**

**НАКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накра́ситься** **2.** *страд. от* **накра́шивать**

**НАКРЕНИ́ТЬ** *сов. что* ауыштырыу, ҡырынайтыу, ҡыйшайтыу, ыҡтырыу, янтайтыу; **накрени́ть ло́дку** кәмәне ҡырынайтыу

**НАКРЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* ауышыу, ҡырынайыу, ҡыйшайыу, ығыу, янтайыу; **са́ни накрени́лись на пра́вый бок** сана уң яҡҡа янтайҙы

**НАКРЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **накрени́ть**

**НАКРЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накрени́ться** **2.** *страд. от* **накреня́ть**

**НА́КРЕПКО** *нареч.* **1.** (*прочно*) бик ныҡ, ныҡ итеп; **на́крепко заби́ть дверь** ишекте ныҡ итеп ҡаҙаҡлау; **на́крепко привяза́ться** бик ныҡ эйәләшеү, эҫенеп китеү **2.** *разг.* (*решительно*) ҡаты (итеп), киҫкен рәүештә; **приказа́ть на́крепко** ҡаты (итеп) бойороу

**НА́КРЕСТ** *нареч.* сатрашлап, асамайлап; **повяза́ть плато́к на́крест** яулыҡты сатрашлап бәйләү

**НАКРИЧА́ТЬ** *сов. на кого* и *без доп.*; *разг.* аҡырыу, ҡысҡырыу, аҡырыныу, ҡысҡырыныу, ҡысҡырып әрләү

**НАКРИЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (үс ҡанғансы) ҡысҡырыу

**НАКРОИ́ТЬ** *сов. что, чего* (күп итеп) бесеү, бесеп ҡуйыу (*кейем-һалымды*); **накрои́ть фа́ртуков** күп итеп алъяпҡыстар бесеп ҡуйыу

**НАКРОМСА́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* (күп итеп) телгеләп ташлау, тураҡлап (киҫкеләп) бөтөү (бөтөрөү); **накромса́ть хле́ба** икмәкте телгеләп ташлау

**НАКРОШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* ваҡлау, турау, ваҡлап (турап) ҡуйыу (ташлау, һалыу); **накроши́ть мя́са** ит турау **2.** (*насорить*) сүпләү, ҡыйлау, сүпләп бөтөрөү, ҡыйлап ташлау; **накроши́ть на полу́** иҙәнде ҡыйлау

**НАКРУТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*намотать*) урау, сырмау; **накрути́ть ни́тки на челно́к** һоҫаға еп урау **2.** *что, чего* (*свить*) ишеү, сиратыу, бороу, ишеп (сиратып) ҡуйыу; **накрути́ть верёвок** бау ишеп ҡуйыу

**НАКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **накрути́ть**

**НАКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **накры́ть**

**НАКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **накры́ться** **2.** *страд. от* **накрыва́ть**

**НАКРЫ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ябыу, ҡаплау, йәйеү, бөркәү, ябып (ҡаплап, бөркәп) ҡуйыу, йәйеп (түшәп) ҡуйыу; **накры́ть мешки́ от дождя́** тоҡтарҙы ямғырҙан ябып ҡуйыу; **накры́ть стол ска́тертью** өҫтәлгә ашъяулыҡ йәйеү **2.** *разг.* тотоу, өҫтөнә барып сығыу; **накры́ли престу́пников** енәйәтселәрҙе тотоу ♦ **накры́ть (на) стол** табын әҙерләү, аш ултыртыу

**НАКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* ябыныу, ҡапланыу, бөркәнеү; **накры́ться пле́дом** плед ябыныу; **накры́ться от дождя́** ямғырҙан ҡапланыу

**НАКУПА́ТЬ I** *несов. см.* **накупи́ть**

**НАКУПА́ТЬ II** *сов. кого-что*; *разг.* туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) һыу индереү (ҡойондороу); **накупа́ть ребёнка** баланы туйғансы ҡойондороу

**НАКУПА́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **накупа́ть** I

**НАКУПА́ТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* туйғансы һыу инеү (ҡойоноу)

**НАКУПИ́ТЬ** *сов. что, чего* күпләп (күп итеп) һатып алыу, һатып алып ҡуйыу; **накупи́ть книг** күп итеп китап һатып алыу

**НАКУ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **накури́ть** 2; **2.** *прил.* тәмәке төтөнө менән тулған; **наку́ренная ко́мната** тәмәке төтөнө менән тулған бүлмә

**НАКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **накури́ть**

**НАКУ́РИВАТЬСЯ** *несов. см.* **накури́ться**

**НАКУРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* тәмәке тартып төтәтеү, тәмәке төтөнө менән тултырыу **2.** *что, чего* ҡыуып (ҡайнатып) алыу, әҙерләү; **накури́ть смолы́** ыҫмала ҡайнатып алыу

**НАКУРИ́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы (тәмәке) тартыу

**НАКУРОЛЕ́СИТЬ** *сов.*; *прост.* шаярыу, мутлыҡ эшләү, бәлә тыуҙырыу

**НАКУСА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (*о насекомых*) тешләп (талап) бөтөү, талау; **его́ накуса́ли комары́** уны серәкәйҙәр талап бөткән

**НАКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **накуса́ть**

**НАКУ́ТАТЬ** *сов. что, чего*; *прост.* өҫтө-өҫтөнә кейҙереү, ҡат-ҡат урау (кейендереү); **наку́тать ребёнка** баланы ҡат-ҡат кейендереү

**НАКУ́ТАТЬСЯ** *сов.*; *прост.* өҫтө-өҫтөнә кейеү, ҡат-ҡат кейенеү, ураныу; **наку́таться в моро́зные дни** һалҡын көндәрҙә ҡат-ҡат кейенеү

**НАКУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **наку́тать**

**НАКУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **наку́таться**

**НАЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **наложи́ть** 6

**НАЛАГА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **налага́ть**

**НАЛА́ДИТЬ** *сов. что* **1.** (*привести в порядок*) көйләү, рәтләү, көйгә (рәткә) һалыу, төҙәтеү, йүнәтеү, яйлау, уңайлау; **нала́дить маши́ну** машинаны йүнәтеү; **нала́дить гита́ру** гитараны көйләү **2.** (*организовать*) юлға һалыу, ойоштороу, ыңғайлатыу; **нала́дить дисципли́ну** тәртипте юлға һалыу; **нала́дить произво́дство маши́н** машиналар етештереүҙе юлға һалыу

**НАЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* рәтләнеү, яйланыу, уңайланыу, ыңғайланыу, юлға (рәткә) һалыныу; **рабо́та нала́дилась** эш юлға һалынды

**НАЛА́ДКА** *ж*; *тех. см.* **нала́дить** 1; **нала́дка станка́** станок көйләү

**НАЛА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое *тех.* көйләү ...ы, яйлау ...ы, төҙәтеү ...ы; **нала́дочные рабо́ты** көйләү эштәре

**НАЛА́ДЧИК** *м* көйләүсе, төҙәтеүсе (*машиналарҙы, приборҙарҙы*)

**НАЛА́ЖЕННОСТЬ** *ж* ойошҡанлыҡ, ойошторолғанлыҡ, тәртипкә һалынғанлыҡ; **нала́женность рабо́ты** эштең ойошторолғанлығы

**НАЛА́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **нала́дить** **2.** *прил.* яҡшы ойошторолған, яйға һалынған; **нала́женная рабо́та** яйға һалынған эш

**НАЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **нала́дить**

**НАЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нала́диться** **2.** *страд. от* **нала́живать**

**НАЛАКА́ТЬСЯ** *сов.* эсеп туйыу, туйғансы эсеү (*эт, бесәй*); **ко́шка налака́лась молока́** бесәй һөт эсеп туйҙы

**НАЛА́КОМИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы тәм-том ашау, һыйланыу

**НАЛА́ЯТЬСЯ** *сов.*; *разг.* арығансы өрөү

**НАЛГА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* и *без доп.* алдау, ялған һөйләү, ялғанлау, юҡты һөйләү **2.** *на кого-что* яла яғыу, нахаҡ бәлә тағыу; **налга́ть на сосе́да** күршегә яла яғыу

**НАЛЕ́ВО** *нареч.* **1.** (*куда*) һулға, һулға (һул яҡҡа) табан; **сверну́ть нале́во** һулға боролоу **2.** (*где*) һулда, һул яҡта; **нале́во высо́кий дом** һул яҡта бейек өй

**НАЛЕГА́ТЬ** *несов. см.* **нале́чь**

**НАЛЕГКЕ́** *нареч.*; *разг.* **1.** (*без ноши*) еңелсә (генә), әйберһеҙ, йөкһөҙ; **идти́ налегке́, без веще́й** еңелсә, әйберһеҙ генә барыу **2.** (*в лёгкой одежде*) еңел, еңелсә (генә), (йоҡа) кейенеп, еңел (йоҡа) кейемдән; **она́ была́ налегке́** ул еңелсә генә кейенгән ине

**НА́ЛЕДЬ** *ж* шәре, тыуыш (*боҙ өҫтөнә сыҡҡан һыу*); **вы́ступила на́ледь** шәре сыҡҡан

**НАЛЕЖА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы ятыу, ятыуҙан ялҡыу; **належа́ться во вре́мя боле́зни** ауырығанда ятыуҙан ялҡыу

**НАЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **нале́зть**

**НАЛЕ́ЗТЬ** *сов. на кого-что* и *без доп.*; *разг.* **1.** (*влезть*) һырышыу, һырып алыу, ҡаплап алыу, ябырылыу, ябырылып килеп менеү, килеп өйөлөү, инеп тулыу; **льди́ны нале́зли одна́ на другу́ю** боҙҙар береһе өҫтөнә береһе килеп өйөлгән **2.** (*об одежде, обуви*) һыйыу, таман булыу, ярау; **сапо́г с трудо́м нале́з** итек көскә һыйҙы

**НАЛЕПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* йәбештереү; **налепи́ть афи́шу** афиша йәбештереү **2.** *что, чего* әүәләп яһау (яһап ҡуйыу); **налепи́ть игру́шек** әүәләп уйынсыҡтар яһау

**НАЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **налепи́ть** 1

**НАЛЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **налепля́ть**

**НАЛЁТ** *м* **1.** *см.* **налете́ть** 2, 4; **налёт авиа́ции** авиацияның һөжүм итеүе; **налёт бу́ри** кинәт ел-дауыл ҡубыу **2.** (*неожиданное стремительное нападение*) һөжүм яһау, (һөжүм итеп) талау, баҫыу **3.** (*тонкий слой чего-л.*) ҡуныҡ, ҡатлам; **налёт пы́ли** туҙан ҡуныҡы **4.** *мед.* үңәҙ, сабыртма; **на языке́ больно́го ви́ден се́рый налёт** ауырыуҙың телендә һоро үңәҙ күренеп тора ♦ **с налёта (налёту)**: 1) осоп (сабып, йүгереп) барған көйө; 2) уйламаҫтан, шунда уҡ, бик тиҙ

**НАЛЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **налете́ть**

**НАЛЕТА́ТЬ II** *сов. что, чего* осоу, осоп үтеү, осоп үткәреү (*күпмелер ваҡыт, араны*); **налета́ть сто ты́сяч киломе́тров** йөҙ мең километр осоп үтеү

**НАЛЕТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* арығансы (туйғансы) осоу, осоп арыу; **налета́ться за́ день** көнө буйы осоп арыу

**НАЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *на кого-что*; *перен., разг.* барып (килеп) бәрелеү, һөжүм итеү, тап булыу, барып сығыу; **налете́ть на столб** бағанаға килеп бәрелеү; **налете́ть на вра́жеский отря́д** дошман отрядына һөжүм итеү **2.** *на кого-что* (*напасть с воздуха*) атылыу, ташланыу, (ҡапыл) һөжүм итеү, осоп ҡуныу; **ко́ршун налете́л на цыплёнка** төйләгән себешкә ташланды **3.** *на кого-что*; *перен.* (*наброситься с угрозами, обвинениями и т.п.*) ташланыу, янап ҡурҡытыу; **налете́ть с упрёками** үпкә һүҙҙәре менән ташланыу **4.** (*внезапно начаться — о ветре, буре*) ҡапыл сығыу, ҡубыу, ҡүтәрелеү; **налете́л ве́тер** (ҡапыл) ел сыҡты **5.** (*прилететь в большом количестве*) ябырылыу, күпләп осоп килеп төшөү; **налете́ла ста́я га́лок** бер өйөр сәүкә ябырылды **6.** (*осесть тонким слоем*) ҡуныу, ултырыу; **налете́ла пыль** саң ултырҙы

**НАЛЁТЧИК** *м* талаусы, баҫҡынсы, юлбаҫар

**НАЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *на кого-что* (өҫтөнә) ятыу, терәлеп (ятып) ауырлыҡ һалыу, таяныу, баҫыу,

этеү; **нале́чь на стол гру́дью** күкрәк менән өҫтәлгә ятыу; **нале́чь плечо́м на дверь** иңбаш менән ишекте этеү **2.** *на что*; *перен*., *разг*. нык бирелеү, тырышыу, бөтә көстө һалыу; **нале́чь на учёбу** уҡыуға нык бирелеү; **нале́чь на вёсла** бөтә көстө һалып ишеү **3.** *на кого-что*; *перен*., *прост*. (*нажать*) ҡыҫыу, ҡыҫымға алыу; **нале́чь на подчинённых** ҡул аҫтында эшләүселәрҙе ҡыҫыу **4.** төшөү, ятыу; **роса́ налегла́ на зе́лень** үләндәргә ысыҡ төштө

**НАЛИ́В** *м* **1.** *см*. **нали́ть** 1; **нали́в бензи́на в цисте́рны** цистерналарға бензин (ҡойоп) тултырыу **2.** (*созревание*) етеү, бешеү, өлгөрөү, тулышыу, емгә туйыу; **я́блоки хоро́шего нали́ва** яҡшы өлгөргән алмалар ♦ **бе́лый нали́в** аҡ алма (*сорт*)

**НАЛИВА́ТЬ** *несов. см*. **нали́ть**

**НАЛИВА́ТЬСЯ** *несов*. **1.** *см*. **нали́ться 2.** *страд. от* **налива́ть**

**НАЛИ́ВКА** *ж* **1.** *спец. см*. **нали́ть** 1 — **налива́ть 2.** еләк-емеш шарабы

**НАЛИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*приспособленный для перевозки жидких грузов*) шыйыҡсалар һалып йөрөтә торған; **наливны́е суда́** шыйыҡсалар һалып йөрөтә торған суднолар **2.** һыу ҡойоп яһалған; **наливно́й като́к** һыу ҡойоп яһалған каток **3.** *спец*. (*приводимый в движение водой*) һыу ...ы, һыу әйләндерә торған; **наливна́я ме́льница** һыу тирмәне **4.** тулышып бешкән, тулышҡан, өлгөргән, һутлы; **наливно́е я́блоко** тулышып бешкән алма

**НАЛИЗА́ТЬСЯ** *сов. чего*; *разг*. (*вдоволь полизать*) туйғансы яланыу (ялау), яланып (ялап) туйыу

**НАЛИ́М** *м* шамбы (*балыҡ*)

**НАЛИ́МИЙ,** -ья, -ье шамбы ...ы; **нали́мья голова́** шамбы башы

**НАЛИНОВА́ТЬ** *сов. что*, *чего* һыҙып сығыу (бөтөрөү, ҡуйыу), һыҙып әҙерләп ҡуйыу; **налинова́ть тетра́дь** дәфтәрҙе һыҙып сығыу

**НАЛИПА́ТЬ** *несов. см*. **нали́пнуть**

**НАЛИ́ПНУТЬ** *сов*. (өҫтөнә) йәбешеү, һылашыу; **на сапоги́ нали́пла грязь** итеккә бысраҡ йәбеште

**НАЛИТО́Й,** -ая, -ое (*о плодах*, *зерне и т.п.*) *см*. **наливно́й** 4; **налито́й ко́лос пшени́цы** тулышҡан бойҙай башағы **2.** (*о плечах*, *руках и т.п.*) тулы, һимеҙ; **налиты́е пле́чи** тулы иңбаштар **3.** (*о человеке*) тығыҙ тәнле, ныҡлы; **налито́й па́рень** ныҡлы егет

**НАЛИ́ТЬ** *сов*. **1.** *что* (*наполнить*) ҡойоу, һалыу, ҡойоп тултырыу, тултырып ҡуйыу, яһау; **нали́ть чай в ча́шку** сынаяҡҡа сәй яһау **2.** *что*, *чего* (*разлить по поверхности*) түгеү; **нали́ть черни́ла на стол** өҫтәлгә ҡара түгеү **3.** *что*, *чего* (*изготовить литьём*) ҡойоу, ҡойоп яһау; **нали́ть стальны́х дета́лей** ҡорос деталдәр ҡойоу

**НАЛИ́ТЬСЯ** *сов*. **1.** тулыу, ҡойолоу, түгелеү; **в ло́дку налила́сь вода́** кәмәгә һыу тулған; **глаза́ налили́сь слеза́ми** күҙгә йәш тулды **2.** (*наполниться соком — о плодах*, *зерне*) тулышыу, өлгөрөү, етеү, бешеү; **ви́шни налили́сь** сейә(ләр) бешкән ♦ **нали́ться кро́вью** биткә ҡан йүгереү (*асыуҙан ҡыҙарыу*), ҡан баҫыу (*күҙҙе*)

**НАЛИЦО́** *нареч. в знач. сказ*. бар, бында, ошонда, үҙ урынында, күҙ алдында, күренеп тора; **фа́кты налицо́** факттар бар; **результа́ты налицо́** һөҙөмтәләр күҙ алдында

**НАЛИ́ЧЕСТВОВАТЬ** *несов*.; *книжн*. бар булыу, күҙ алдында булыу, күренеп тороу; **нали́чествуют все при́знаки заболева́ния** ауырыуҙың бөтә билгеләре күренеп тора

**НАЛИ́ЧИЕ** *с* барлыҡ, бар булыу, урынында, күҙ алдында булыу; **све́дения о нали́чии де́нег** аҡса барлығы тураһында(ғы) мәғлүмәттәр; **при нали́чии** булһа, булғанда, булған хәлдә ♦ **в нали́чии (быть, име́ться, оказа́ться и т.п.)** бар булыу, күҙ алдында булыу, күренеп тороу

**НАЛИ́ЧНИК** *м* йөҙлөк (*тәҙрәлә, ишектә*); **о́кна с расписны́ми нали́чниками** сәмәр йөҙлөклө тәҙрәләр

**НАЛИ́ЧНОСТЬ** *ж* **1.** *см*. **нали́чие 2.** бар булғаны, булған тиклеме, күләм (*хәҙерге ваҡытта*); **нали́чность това́ров в магази́не** магазиндағы тауарҙарҙың күләме ♦ **в нали́чности (быть, име́ться, оказа́ться и т.п.)** *см*. **в нали́чии (быть, име́ться, оказа́ться и т.п.)**

**НАЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** булған, бар булған, әҙер, ҡулаҡса, ҡулдағы; **нали́чные де́ньги** ҡулаҡса **2.** *в знач. сущ*. **нали́чные** *мн*. ҡулаҡса ♦ **нали́чный расчёт** *фин*. ҡулаҡса түләү; **за нали́чный расчёт** ҡулаҡсаға

**НАЛО́БНИК** *м* **1.** (*в конской узде*) маңлайса; **сере́бряный нало́бник** көмөш маңлайса **2.** (*налобная повязка*) маңлай бәйләмесе

**НАЛО́БНЫЙ,** -ая, -ое маңлайҙағы, маңлайса, маңлай ...ы; **нало́бная повя́зка** маңлай бәйләмесе; **нало́бный реме́нь** (*в узде*) маңлай бауы

**НАЛОВИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* (бер ни тиклем) тотоу; **налови́ть с полведра́ окуне́й** ярты биҙрә самаһы алабуға тотоу

**НАЛОВЧИ́ТЬСЯ** *сов. в чём* и *без доп*.; *разг*. оҫтарыу, таҫылланыу, өйрәнеү, оҫтарып (өйрәнеп) китеү; **наловчи́ться в вожде́нии тра́ктора** трактор йөрөтөргә оҫтарып китеү (алыу)

**НАЛО́Г** *м* һалым; **обложи́ть нало́гом** һалым һалыу; **плати́ть нало́г** һалым түләү

**НАЛО́ГОВЫЙ,** -ая, -ое һалым(дар) ...ы; **нало́говая поли́ция** һалым полицияһы; **нало́говая систе́ма** һалым системаһы

**НАЛОГООБЛОЖЕ́НИЕ** *с*; *фин*. һалым һалыу; **систе́ма налогообложе́ния** һалым һалыу системаһы

**НАЛОГОПЛАТЕ́ЛЬЩИК** *м* и **НАЛОГОПЛАТЕ́ЛЬЩИЦА** *ж*; *офиц*. һалым түләүсе

**НАЛОЖЕ́НИЕ** *с см.* **наложи́ть** 1—4, 6; **наложе́ние повя́зки на ра́ну** яраны бәйләү; **наложе́ние гри́ма** грим һалыу; **наложе́ние печа́ти** мөһөр баҫыу; **наложе́ние взыска́ния** шелтә биреү

**НАЛО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **наложи́ть** ♦ **нало́женный платёж** түләп алынмалы; **вы́слать кни́гу нало́женным платежо́м** түләп алынмалы итеп китап ебәреү

**НАЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*положить сверху*) (өҫтөнә) һалыу, ҡуйыу; **наложи́ть на шала́ш ве́ток** ҡыуыш өҫтөнә ағас ботаҡтары һалыу **2.** *мед.* һалыу, ҡуйыу, ябыу, бәйләү; **наложи́ть гипс** гипс һалыу **3.** *что* (*покрыть сверху*) ҡаплау; **наложи́ть на карти́ну лак** рәсемде лак менән ҡаплау **4.** *что* (*поставить знак, метку*) һуғыу, баҫыу, һалыу, ҡуйыу; **наложи́ть клеймо́** тамға һалыу; **наложи́ть ви́зу** виза ҡуйыу **5.** *что, чего* тултырыу, өйөү, өйөп ҡуйыу, тейәү, тейәп ҡуйыу; **наложи́ть книг на стол** өҫтәлгә китаптар өйөп ҡуйыу **6.** *что* (*подвергнуть*) һалыу, биреү; **наложи́ть аре́ст на иму́щество** мөлкәткә арест һалыу; **наложи́ть взыска́ние** шелтә биреү ♦ **наложи́ть печа́ть (печа́ти)** *на что* (мисәт баҫып) файҙаланыуҙан тыйыу, файҙаланырға рөхсәт бирмәү; **наложи́ть (свою́) печа́ть (отпеча́ток)** *на кого-что* эҙ ҡалдырыу, йоғонто яһау; **наложи́ть ру́ку (ла́пу)** *на что* үҙ ҡулына алыу, үҙ ихтыярына буйһондороу; **наложи́ть на себя́ ру́ки** *прост.* үҙенә ҡул һалыу, үҙен-үҙе үлтереү; **наложи́ть шов** *мед.* ҡырҡылған (яраланған) урынды тегеү

**НАЛОКО́ТНИК** *м* **1.** еңсә (*терһәккә кейелә* (*кейҙерелә*) *торған ең*) **2.** *ист.* терһәк ҡалҡансығы (*һуғылыу-бәрелеүҙән һаҡлау өсөн*)

**НАЛОМА́ТЬ** *сов. что, чего* һындырыу, һындыра биреү, (бер аҙ) һындырып ҡуйыу (әҙерләү); **ве́тер налома́л су́чьев** ел ботаҡтарҙы һындырған; **налома́ть ве́ников** миндек һындырыу ♦ **налома́ть бока́ (ше́ю)** *кому; прост.* ҡабырғаһын һанау, ныҡ итеп туҡмау; **налома́ть дров** *прост.* хата ебәреү, яңылышлыҡ эшләү, ахмаҡлыҡ ҡылыу

**НАЛУЩИ́ТЬ** *сов. что, чего* ҡабығынан (ҡуҙағынан) әрсеү, тиреү, һыҙырыу; **налущи́ть горо́ху** борсаҡ тиреү

**НАЛЮБОВА́ТЬСЯ** *сов. кем-чем, на кого-что* (туйғансы, ҡыҙығып) һоҡланып ҡарау; (*с отриц. "не"*) һоҡланып (ҡарап) туя алмау; **не налюбова́ться красото́й ле́са** урмандың матурлығына һоҡланып ҡарап туя алмау; **не налю́буюсь на дете́й** балаларға ҡарап туя алмайым

**НАМАГНИ́ТИТЬ** *сов. что* магнитлау, магнитландырыу; **намагни́тить желе́зо** тимерҙе магнитландырыу

**НАМАГНИ́ТИТЬСЯ** *сов.* магнитланыу; **мета́лл намагни́тился** металл магнитланған

**НАМАГНИ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **намагни́тить**

**НАМАГНИ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **намагни́титься** **2.** *страд. от* **намагни́чивать**

**НАМА́З** *м; рел.* намаҙ; **вече́рний нама́з** аҡшам намаҙы, киске намаҙ

**НАМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* һылау, һөртөү, майлау, яғыу; **нама́зать хлеб ма́слом** икмәккә май яғыу; **нама́зать пе́чку гли́ной** мейесте балсыҡ менән һылау **2.** *разг.* (*накрасить*) буяу; **нама́зать гу́бы** ирендәрҙе буяу **3.** *без доп.; разг.* бысратыу, буяу; **нама́зать на полу́** иҙәнде бысратыу **4.** *что, чего* и *без доп.; разг.* (*плохо нарисовать, написать и т.п.*) бояштырыу, бояштырғылау, һыҙғылаштырыу

**НАМА́ЗАТЬСЯ** *сов.* буяныу, һөртөнөү, һыланыу; **нама́заться ма́зью** мазь һөртөнөү **2.** *разг.* биҙәнеү; **нама́заться пе́ред вы́ходом на сце́ну** сәхнәгә сығыр алдынан биҙәнеү

**НАМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **нама́зать** 1, 2

**НАМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нама́заться** **2.** *страд. от* **нама́зывать**

**НАМАЛЕВА́ТЬ** *сов. кого-что; разг.* беленер-беленмәҫ (арлы-бирле, насар итеп) буяу; **намалева́ть карти́ну** һүрәтте насар итеп буяу

**НАМАЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **намалева́ть**

**НАМА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **намоло́ть**

**НАМАРА́ТЬ** *сов. что-чего* **1.** *прост.* (*запачкать*) бысратыу, бысратып бөтөрөү; **намара́ть белья́** керҙе бысратыу **2.** *разг.* (*о рисунке*) яһаштырғылау, арлы-бирле яһап ташлау (яҙыу), һыҙғылау, һыҙғылап ташлау; **намара́ть портре́т** арлы-бирле генә (итеп) портрет яһап ташлау

**НАМАРИНОВА́ТЬ** *сов. что, чего* (күпмелер) маринадлап ҡуйыу; **намаринова́ть огурцо́в** күп итеп ҡыяр маринадлап ҡуйыу

**НАМА́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **нама́слить**

**НАМА́СЛИТЬ** *сов. что; разг.* майлау, май яғыу (һөртөү); **нама́слить блины́** ҡоймаҡ майлау; **нама́слить хлеб** икмәккә май яғыу

**НАМАТРА́СНИК** и **НАМАТРА́ЦНИК** *м* матрас тышлығы

**НАМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **намота́ть**

**НАМА́ТЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **намота́ться** I; **2.** *страд. от* **нама́тывать**

**НАМА́ТЫВАТЬСЯ II** *несов. см.* **намота́ться** II

**НАМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **намочи́ть**

**НАМА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нама́чивать**

**НАМЁК** *м* **1.** ишара, ым, ситләтеп (төрттөрөп, һиҙҙереп) әйтелгән һүҙ; **говори́ть намёками** төрттөрөп һөйләү **2.** *перен.* (*слабое подобие чего-л.*) эҙ, әҫәр; **да́же намёка нет на примире́ние** ярашыуҙың эҙе лә юҡ

**НАМЕКА́ТЬ** *несов. на кого-что* ишара итеү, ситләтеп (төрттөрөп, һиҙҙереп) әйтеү, ымлау

**НАМЕКНУ́ТЬ** *сов. см.* **намека́ть**

**НАМЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **намели́ть**

**НАМЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наме́ливать**

**НАМЕЛИ́ТЬ** *сов. что* аҡбурлау, аҡбур һөртөү; **намели́ть стёкла** быялаға аҡбур һөртөү

**НАМЕНЯ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** (*разменять*) күпмелер (аҡса) ваҡлап алыу; **наменя́ть ме́лочи** аҡса ваҡлап алыу **2.** (*выменять*) алыштырыу, алыштырып (алмашып) алыу; **наменя́ть зерно́ на сельхозмаши́ны** ашлыҡты ауыл хужалығы машиналарына алыштырып алыу

**НАМЕРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* ниәтләү, ниәтләнеү, йыйыныу, самалау, иҫәпләү, иҫәп тотоу, уйлау, -маҡсы/-мәксе булыу; **намерева́ться уе́хать** китмәксе булыу

**НАМЕ́РЕН,** -а, -о *в знач. сказ., с неопр.* -маҡсы/-мәксе була, ниәте (уйы, самаһы, иҫәбе) бар; **куда́ вы наме́рены е́хать?** һеҙ ҡайҙа бармаҡсы булаһығыҙ?

**НАМЕ́РЕНИЕ** *с* ниәт, иҫәп, теләк, уй, сама; **серьёзные наме́рения** етди ниәттәр; **благи́е наме́рения** изге уйҙар ♦ **без (вся́кого) наме́рения** бер ниндәй ниәтһеҙ; **с наме́рением** ниндәйҙер ниәт менән

**НАМЕ́РЕННО** *нареч.* юрый, уйлап, белеп, аңлы рәүештә; **наме́ренно оскорбля́ть** юрый мыҫҡыл итеү

**НАМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое юрый эшләнгән, белеп (белә тороп) эшләнгән, алдан белеп (уйлап) -ған/-гән, аңлы рәүештә -ған/-гән; **наме́ренный посту́пок** аңлы рәүештә эшләнгән эш

**НАМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **намёрзнуть**

**НАМЁРЗНУТЬ** *сов.* **1.** туңыу, туңып ҡаплау, күп булып ҡатыу; **на ступе́ньках намёрзло мно́го льда** баҫҡыстар өҫтөндә бик күп боҙ туңған **2.** *разг.* туңыу, өшөү, ҡатыу; **ру́ки намёрзли** ҡулдар өшөнө

**НАМЁРЗНУТЬСЯ** *сов.*; *разг.* өшөү, туңыу, өшөп (туңып) бөтөү; **намёрзнуться в пути́** юлда туңып бөтөү

**НА́МЕРТВО** *нареч.*; *разг.* **1.** (*до смерти*) үлтергәнсе, һәләк иткәнсе **2.** (*накрепко*) бик ныҡ итеп, ҡуша, айырып ала алмаҫлыҡ итеп (*асылмаҫлыҡ, һүтелмәҫлек һ.б.*); **на́мертво заби́ть дверь** ишекте асылмаҫлыҡ итеп ҡаҙаҡлау

**НАМЕСИ́ТЬ** *сов. что, чего* иҙеү, баҫыу, иҙеп (баҫып) ҡуйыу; **намеси́ть те́сто** ҡамыр баҫып ҡуйыу

**НАМЕСТИ́** *сов.* **1.** *что, чего* һепереп, өйөп ҡуйыу; **намести́ ку́чу му́сора** күп итеп һепереп сүп өйөп ҡуйыу **2.** (*о ветре, вьюге и т.п.*) өрөп өйөү, (килтереп) һалыу; **ве́тер намёл песча́ные барха́ны** ел ҡом тауҙарын килтереп өйгән **3.** *что безл.* килтереп өйөү (һалыу), һалыу; **ве́тром намело́ сне́гу** ел ҡар килтереп һалған

**НАМЕ́СТНИК** *м*; *ист.* наместник (*урындағы идара башлығы*)

**НАМЕ́СТНИЧЕСТВО** *с*; *ист.* **1.** наместник вазифаһы **2.** наместниклыҡ (*административ-территориаль берәмек*)

**НАМЁТАННОСТЬ** *ж* күнеккәнлек; **намётанность глаз** күҙҙәрҙең күнеккәнлеге

**НАМЁТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **намета́ть** II; **намётанные стога́** ҡойолған кәбәндәр **2.** *прил.* (*натренированный — о глазе, руке*) күнеккән, өйрәнгән; **намётанная рука́** күнеккән ҡул

**НАМЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **намести́**

**НАМЕТА́ТЬ II** *сов.* **1.** *что, чего* өйөү, һалыу, ҡуйыу; **намета́ть стог** кәбән һалыу **2.** *что, чего* (*произвести на свет — о рыбе*) сәсеү; (*о животных*) балалау, бала килтереү; **ры́ба намета́ла икры́** балыҡ ыуылдырыҡ сәскән; **лиса́ намета́ла лися́т** төлкө балалаған **3.** *что*; *разг.* күнектереү, өйрәнеү; **намета́ть глаз** күҙҙәрҙе күнектереү

**НАМЕТА́ТЬ III** *сов.* **1.** *что, чего*; *портн.* типсеү, йүрмәү; **намета́ть рука́в** ең типсеү **2.** *что, чего* (бер ни тиклем) типсеп әҙерләү (ҡуйыу) (*тегер өсөн*); **намета́ть не́сколько пла́тьев** бер нисә күлдәкте типсеп ҡуйыу

**НАМЕ́ТИТЬ I** *сов. что* **1.** (*обозначить*) билдә (тамға) һалыу, билдә һалып сығыу, билдәләү, күрһәтеү, инселәү; **наме́тить брёвна клеймо́м** бүрәнәләргә билдә һалып сығыу; **наме́тить доро́гу ко́лышками** ҡаҙыҡтар менән юлды билдәләп сығыу **2.** (өҫтән-өҫтән генә) һыҙып сығыу, һыҙып билдәләү, билдәләү; **наме́тить ко́нтур дета́ли** деталдең контурын һыҙып сығыу

**НАМЕ́ТИТЬ II** *сов.* **1.** *что*; *разг.* (*нацелить*) төбәү, төҙәү, күҙәү, тоҫҡау; **наме́тить ружьё** мылтыҡ төҙәү **2.** *что и с неопр.* (*определить срок*) билдәләү, билдәләп ҡуйыу, күҙ уңында тотоу; **наме́тить день отъе́зда** китеү көнөн билдәләп ҡуйыу

**НАМЕ́ТИТЬСЯ I** *сов.* (*обозначиться*) беленеү, күренеү, билдәләнеү; **наме́тилось направле́ние рабо́т** эш йүнәлеше билдәләнде

**НАМЕ́ТИТЬСЯ II** *сов.*; *разг.* (*нацелиться*) төбәү, төҙәү, күҙәү, тоҫҡау; **наме́титься стреля́ть в мише́нь** сәпкә атырға төҙәү

**НАМЁТКА I** *ж* **1.** *см.* **намета́ть** III; **намётка пла́тья** күлдәк типсеү **2.** (*нитка*) типсеү ебе; **выдёргивать намётку** типсеү ебен һурып алыу

**НАМЁТКА II** *ж* **1.** *см.* **наме́тить** I 2; **намётка пла́на рабо́ты** эш планын билдәләү **2.** (*предположительный план*) алдан уйлап ҡуйылған план; **намётка рабо́ты на пять лет вперёд** алдағы биш йылға уйлап ҡуйылған эш планы

**НАМЁТКА III** *ж* бүлемле ҡолға (*һыу тәрәнлеген үлсәү өсөн*)

**НАМЁТЫВАНИЕ I** *с см.* **намётывать** I

**НАМЁТЫВАНИЕ II** *с см.* **намётывать** II; **намётывание швов** йөйҙәрҙе типсеп сығыу

**НАМЁТЫВАТЬ I** *несов. см.* **намета́ть** II

**НАМЁТЫВАТЬ II** *несов. см.* **намета́ть** III

**НАМЕЧА́ТЬ I** *несов. см.* **наме́тить** I

**НАМЕЧА́ТЬ II** *несов. см.* **наме́тить** II 2

**НАМЕЧА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **наме́титься** I; **2.** *страд. от* **намеча́ть** I

**НАМЕЧА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** күҙ алдында тотолоу, билдәләнеү, (алдан) уйланылыу, планлаштырылыу; **намеча́лось посеще́ние теа́тра** театрға барыу планлаштырылған **2.** *страд. от* **намеча́ть** II

**НАМЕША́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* ҡушыу, аралаштырыу, болғау, бутау, ҡушып туҡыу; **намеша́ть пшено́ с ри́сом** тары ярмаһын дөгө менән бутау

**НАМЕ́ШИВАТЬ I** *несов. см.* **намеси́ть**

**НАМЕ́ШИВАТЬ II** *несов. см.* **намеша́ть**

**НАМИНА́ТЬ** *несов. см.* **намя́ть**

**НАМИ́НКА** *ж*; *вет.* табан шешеү (*аттарҙа, эш үгеҙҙәрендә*)

**НАМНО́ГО** *нареч.* шаҡтай, байтаҡ, хәтһеҙ (күп); **быть намно́го сильне́е** шаҡтай көслөрәк булыу; **намно́го улу́чшить ка́чество това́ров** тауарҙың сифатын күпкә яҡшыртыу

**НАМОГИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡәбер ...ы, ҡәбер өҫтө ...ы, ҡәбер өҫтөндәге; **намоги́льный па́мятник** ҡәбер өҫтөндәге һәйкәл

**НАМОЗО́ЛИТЬ** *сов. что* сөйәлләндереү, сөйәлләндереп бөтөү; **намозо́лить ру́ки** ҡулдарҙы сөйәлләндереп бөтөү ♦ **намозо́лить глаза́** *кому*; *прост.* йәнгә (теңкәгә) тейеп күҙ алдында тороу, туйҙырып бөтөү

**НАМОКА́ТЬ** *несов. см.* **намо́кнуть**

**НАМО́КНУТЬ** *сов.* ебеү, еүешләнеү, һыуланыу, сыланыу; **неу́бранное се́но намо́кло** йыйылмаған бесән еүешләнде

**НАМО́Л** *м*; *с.-х.* **1.** *см.* **намоло́ть**; **намо́л муки́** он тарттырыу **2.** тарттырылған он күләме

**НАМОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **намолоти́ть**

**НАМОЛА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **намола́чивать**

**НАМОЛО́Т** *м*; *с.-х.* **1.** *см.* **намолоти́ть**; **намоло́т зерна́** ашлыҡ һуғып алыу **2.** төшөм; **намоло́т пшени́цы** бойҙайҙың төшөмө

**НАМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* (бер ни тиклем) һуғыу, һуғып алыу (*игенде*); **намолоти́ть мешо́к пшени́цы** бер тоҡ бойҙай һуғып алыу

**НАМОЛО́ТЬ** *сов.* тарттырыу, тартыу, тарттырып алыу; **намоло́ть мешо́к ржи** бер тоҡ арыш тарттырып алыу

**НАМОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **наморо́зить**

**НАМОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **намора́живать**

**НАМО́РДНИК** *м* морондоҡ, моронса; **соба́ка в намо́рднике** морондоҡ кейҙерелгән эт

**НАМОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, кого-чего* ҡырып (үлтереп) бөтөрөү; **намори́ть крыс** ҡомаҡтарҙы ҡырып бөтөрөү **2.** *что, чего*; *спец.* һыуҙа тотоу; **намори́ть древеси́ны** үҙағасты һыуҙа тотоу

**НАМОРО́ЗИТЬ** *сов. что, чего* туңдырыу, туңдырып алыу; **наморо́зить два куля́ пельме́ней** ике ҡап билмән туңдырыу

**НАМОРО́ЗИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (бик) ныҡ өшөү (туңыу); **наморо́зиться в холо́дную зи́мнюю ночь** ҡышҡы һалҡын төндә бик ныҡ өшөү

**НАМО́РЩЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **намо́рщить**; **намо́рщенные бро́ви** йыйырылған ҡаштар **2.** *прил.* йыйырсыҡлы, сырыҡ; **намо́рщенные ру́ки** йыйырсыҡлы ҡулдар

**НАМО́РЩИВАТЬ** *несов. см.* **намо́рщить**

**НАМО́РЩИТЬ** *сов. что* йыйырыу, сырыштырыу; **намо́рщить нос** танау йыйырыу

**НАМО́РЩИТЬСЯ** *сов.* **1.** йыйырсыҡланыу, сырышыу; **лоб намо́рщился** маңлай йыйырсыҡланды **2.** *перен.* (*покрыться рябью*) бөҙөрләнеү, быжырланыу, шаҙраланыу **3.** сырай һытыу; **намо́рщиться, пока́зывая недово́льство** ризаһыҙлыҡ белдереп сырай һытыу

**НАМОТА́ТЬ** *сов. что* сырмау, (сырмап) урау, урап ҡуйыу; **намота́ть ни́тки на кату́шку** кәтүккә еп сырмау; **намота́ть на́ ногу портя́нку** аяҡҡа силғау урау

**НАМОТА́ТЬСЯ I** *сов.* сырмалыу, уралыу; **ни́тки намота́лись на шпу́льку** еп сүрегә сырмалған

**НАМОТА́ТЬСЯ II** *сов.*; *прост.* **1.** (*устать*) арыу, арып бөтөү, хәлдән тайыу; **намота́ться от тяжёлой рабо́ты** ауыр эштән арып бөтөү **2.** (*вдоволь, долго побродить, поскитаться*) арығансы (туйғансы) йөрөү, ил гиҙеү, ҡыҙырыу

**НАМО́ТКА** *ж* **1.** *см.* **намота́ть**; **намо́тка пря́жи** еп урау **2.** *разг.* (*моток*) йомғаҡ, баҫма еп

**НАМО́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое сырмау ...ы, урау ...ы; **намо́точный бараба́н** урау барабаны

**НАМОЧИ́ТЬ** *сов. что, чего* еүешләү, сылатыу, һыулау, ебетеү, ебетеп ҡуйыу; **намочи́ть бельё** кер ебетеп ҡуйыу

**НАМОЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* еүешләнеү, сыланыу, һыуланыу, ебеү

**НАМУДРИ́ТЬ** и **НАМУ́ДРСТВОВАТЬ** *сов.*; *разг.* бутау, бутап бөтөрөү, артыҡ буталсыҡлыҡ индереү, ҡатмарландырып бөтөрөү, боҙоу; **намудри́ть в свои́х дела́х** үҙеңдең эштәреңә артыҡ буталсыҡлыҡ индереү

**НАМУ́СОРИТЬ** *сов.*; *разг.* ҡыйлау, сүпләү, ҡыйлап (сүпләп) бөтөү; **наму́сорить на ку́хне** кухняны ҡыйлау

**НАМУТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** болғандырыу, болғандырып бөтөү, болғансыҡландырыу; **намути́ть во́ду** һыуҙы болғансыҡландырыу **2.** *кого-что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* ҡотортоу, бутау, тынысһыҙлыҡ тыуҙырыу; **намути́ть го́лову** баш бутау

**НАМУ́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* яфалау, интектереү, яфалап (интектереп, ғазаплап, йөҙәтеп) бөтөрөү; **наму́чила жара́** эҫелек интектереп бөтөрҙө

**НАМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яфаланыу, интегеү, ғазапланыу, яфаланып (интегеп, ғазапланып, йөҙәп, арып) бөтөү; **наму́читься от бессо́нницы** йоҡоһоҙлоҡтан яфаланып бөтөү; **наму́читься с чертежо́м** чертеж һыҙып интегеп бөтөү

**НАМЫ́В** *м* **1.** *см.* **намы́ть**; **намы́в зо́лота** алтын йыуыу **2.** *геол.* йыуылдыҡ, ярлау (*һыу ағыҙып килтереп һалған яр*)

**НАМЫВА́НИЕ** *с см.* **намыва́ть**; **намыва́ние песка́** ҡом йыуҙыртыу

**НАМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **намы́ть**

**НАМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **намы́ться** **2.** *страд. от* **намыва́ть**

**НАМЫВНО́Й,** -ая, -ое **1.** һыу ағыҙып килтергән, йыуҙыртып өйҙөрөлгән; **намывно́й песо́к** һыу ағыҙып килтергән ҡом **2.** йыуҙыртып ҡоролған (төҙөлгән, яһалған); **намывно́е сооруже́ние** йыуҙыртып төҙөлгән ҡоролма

**НАМЫ́КАТЬСЯ** *сов.*; *прост.* күп ауырлыҡтар (ҡыйынлыҡтар) күреү, ҡайғы-хәсрәт киһереү, ғазап (ыҙа) сигеү, интегеү, интегеп бөтөү; **намы́каться по све́ту** илдән-илгә йөрөп интегеп бөтөү ♦ **намы́каться го́ря** *прост.* бик күп ҡайғы-хәсрәт күреү

**НАМЫ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **намы́лить**

**НАМЫ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **намы́литься** **2.** *страд. от* **намы́ливать**

**НАМЫ́ЛИТЬ** *сов. кого-что* һабынлау, һабын һөртөү; **намы́лить ру́ки** ҡулға һабын һөртөү; **намы́лить во́ду** һыуҙы һабынлау ♦ **намы́лить го́лову (ше́ю)** *кому*; *прост.* бик ҡаты әрләү, шелтәләү, кәрәген биреү

**НАМЫ́ЛИТЬСЯ** *сов.* һабынланыу, һабын һөртөнөү; **намы́литься с ног до головы́** баштан-аяҡ һабынланыу

**НАМЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего*; *разг.* (*вымыть*) (бер ни тиклем) йыуыу, йыуып ҡуйыу; **намы́ть мно́го посу́ды** бик күп һауыт-һаба йыуыу **2.** *что, чего* йыуып килтереп өйөү; **река́ намы́ла песку́** йылға йыуып килтереп ҡом өйгән **3.** *что* йыуҙыртып ҡороу (төҙөү, яһау); **намы́ть да́мбу** йыуҙыртып быуа төҙөү **4.** *что, чего* (*добыть*) йыуыу, йыуып айырыу (табыу); **намы́ть зо́лото** алтын йыуыу

**НАМЯКА́ТЬ** *несов. см.* **намя́кнуть**

**НАМЯ́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* ебеп йомшарыу; **сухари́ намя́кли** шөкәрә ебеп йомшарған

**НАМЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*разминая, приготовить*) иҙеү, иҙеп ҡуйыу; **намя́ть ведро́ гли́ны** бер биҙрә балсыҡ иҙеп ҡуйыу **2.** *разг.* талҡыу, йомшартыу; **намя́ть лён** етен талҡыу ♦ **намя́ть бока́ (ше́ю)** *кому*; *прост.* бик ныҡ туҡмап ташлау, ҡабырғаларын һанау

**НАНА́ЙСКИЙ,** -ая, -ое нанай …ы; **на́найский язы́к** нанай теле

**НАНА́ЙЦЫ** *мн.* нанайҙар, нанай халҡы // *ед.* **нана́ец** *м* нанай ир-аты; **нана́йка** *ж* нанай ҡатын-ҡыҙы

**НАНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **наноси́ть** I

**НАНА́ШИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нана́шивать**

**НАНЕСТИ́** *сов.* **1.** *что, чего* (*принести*) алып килеү, килтереү; **нанести́ книг** китап килтереү **2.** *что, чего безл.* килтереп өйөү, (ҡар) һалыу (өйөү); **ве́тром нанесло́ мно́го сне́га** ел бик күп ҡар һалған **3.** *кого-что безл.*; *разг.* (*натолкнуть, увлекая движением воды, ветром*) ултырыу; **ло́дку нанесло́ на мель** кәмә һайға ултырҙы **4.** *что* һөртөү, ҡаплау; **нанести́ лак на карти́ну** рәсемгә лак һөртөү **5.** *что* төшөрөү; **нанести́ ре́ку на планше́т** йылғаны планшетҡа төшөрөү **6.** *что, чего* (*снести — о птицах*) йомортҡа һалыу; **ку́рица нанесла́ яи́ц** тауыҡ күп йомортҡа һалған ♦ **нанести́ оби́ду** хәтер ҡалдырыу, үпкәләтеү; **нанести́ пораже́ние** еңеү; **нанести́ ра́ну** яралау; **нанести́ уда́р** һуғыу; **нанести́ визи́т** *кому* барыу, килеү, визит яһау

**НАНИЗА́ТЬ** *сов. что, чего* (епкә) теҙеү, теҙеп ҡуйыу; **наниза́ть же́мчуг на нить** епкә ынйы теҙеү

**НАНИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **наниза́ть**

**НАНИ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нани́зывать**

**НАНИМА́ТЕЛЬ** *м* яллаусы

**НАНИМА́ТЬ** *несов. см.* **наня́ть**

**НАНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наня́ться** **2.** *страд. от* **нанима́ть**

**НА́НКА** *ж* нанка (*туҡыма*)

**НА́НКОВЫЙ,** -ая, -ое нанка, нанканан тегелгән; **на́нковый пиджа́к** нанка пинжәк

**НА́НОВО** *нареч.*; *разг.* яңынан, ҡайтанан; **переписа́ть на́ново** яңынан күсереп яҙыу

**НАНО́С** *м* **1.** *см.* **нанести́** — **наноси́ть** II; **2.** өйөм; **нано́с сне́га** ҡар өйөмө

**НАНОСИ́ТЬ I** *сов. что, чего* ташып ҡуйыу, ташыу, килтереү (*бер нисә ҡабат*); **наноси́ть камне́й** таш ташып ҡуйыу

**НАНОСИ́ТЬ II** *несов. см.* **нанести́**

**НАНО́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ташылдыҡ; **нано́сный песо́к** ташылдыҡ ҡом **2.** *перен.* тәбиғи булмаған, сит, осраҡлы, тышҡы; **нано́сные мечты́** тәбиғи булмаған хыялдар

**НА́НСУК** *м* нансук (*туҡыма*)

**НА́НСУКОВЫЙ,** -ая, -ое нансук, нансуктан тегелгән; **на́нсуковое произво́дство** нансук етештереү

**НАНЮ́ХАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*вдоволь понюхать*) туйғансы еҫкәү, еҫкәп туйыу; **наню́хаться табаку́** тәмәке еҫкәп туйыу **2.** (*нюхая, дойти до болезненного состояния*) иҫергәнсе еҫкәү, еҫкәп иҫереү, еҫкә иҫереү; **наню́хаться спи́рту** спирт еҫкәп иҫереү

**НАНЯТО́Й,** -ая, -ое *разг.* **1.** түләп файҙаланылған, ялға алынған; **наня́тая кварти́ра** түләп файҙаланылған фатир **2.** ялланма; **нанято́й рабо́тник** ялланма эшсе

**НАНЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* яллау; **наня́ть рабо́чих** эшселәр яллау **2.** *что* түләп файҙаланыу(ға алыу), ялға алыу; **наня́ть кварти́ру** фатирҙы түләп файҙаланыу

**НАНЯ́ТЬСЯ** *сов.* ялланыу; **наня́ться пло́тником** балта оҫтаһы булып ялланыу

**НАОБЕЩА́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* (күп итеп) вәғәҙә биреү, вәғәҙә биреп (итеп) ташлау (ышандырыу); **наобеща́ть гости́нцев** күстәнәстәр вәғәҙә итеп ташлау

**НАОБОРО́Т** *нареч.* **1.** кире, кирегә (*аҙағынан башына*); **прочита́ть сло́во наоборо́т** һүҙҙе кирегә уҡыу; **всё де́лать наоборо́т** бөтәһен дә кире эшләү **2.** *в знач. вводн. сл.* (*напротив*) киреһенсә; **он не руга́л нас, а, наоборо́т, похвали́л** ул беҙҙе әрләмәне, ә, киреһенсә, маҡтап ҡуйҙы

**НАОБУ́М** *нареч.*; *разг.* уйламайынса, уйлап-нитеп тормайынса, уйламаҫтан; **отве́тить наобу́м** уйлап-нитеп тормайынса яуап биреү

**НАОРА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **накрича́ть**

**НАО́ТМАШЬ** *нареч.* киҙәнеп, ҡоласлап, бөтә көскә; **уда́рить нао́тмашь** киҙәнеп һуғыу

**НАОТРЕ́З** *нареч.* ҡырҡа, ҡырт киҫеп, бөтөнләй, ҡәтғи рәүештә; **отказа́ться наотре́з** ҡәтғи рәүештә кире ҡағыу

**НАПА́ДАТЬ** *сов.* күп ҡойолоу (төшөү, яуыу); **на доро́гу напа́дало мно́го ли́стьев** юлға бик күп япраҡ ҡойолған

**НАПАДА́ТЬ I** *несов. см.* **напа́сть** I

**НАПАДА́ТЬ II** *несов. см.* **напа́сть** II

**НАПАДА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **напада́ть** I; **2.** *в знач. сущ.* **напада́ющий** *м*; *спорт.* һөжүм итеүсе (*футбол, хоккей һ.б. уйындарҙа*)

**НАПАДЕ́НИЕ** *с* **1.** һөжүм, һөжүм итеү; **вооружённое нападе́ние** ҡоралды һөжүм **2.** *спорт.* һөжүм итеү, ташланыу

**НАПА́ДКИ** *только мн.* бәйләнеү(ҙәр), ғәйеп ташлау(ҙар), нахаҡ бәлә(ләр); **подверга́ться напа́дкам** ғәйеп ташлауға дусар ителеү

**НАПА́ИВАТЬ I** *несов. см.* **напои́ть** 2

**НАПА́ИВАТЬ II** *несов. см.* **напая́ть**

**НАПА́ЙКА** *ж* **1.** *см.* **напая́ть** — **напа́ивать** II; **напа́йка конца́ про́вода** сымдың осон йәбештереү **2.** йәбештерелгән киҫәк (*паять итеп*); **напа́йка на цо́коле ла́мпы** лампаның цоколенә йәбештереп ҡуйылған киҫәк

**НАПА́КОСТИТЬ** и **НАПА́КОСТНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* этлек эшләү (итеү), насарлыҡ ҡылыу, зыян (зарар) килтереү; **напа́костить в мелоча́х** ваҡ-төйәк эштәрҙә этлек итеү

**НАПА́ЛМ** *м* напалм (*яндыра торған бензинлы ҡатышма*)

**НАПА́ЛМОВЫЙ,** -ая, -ое напалмлы; **напа́лмовая бо́мба** напалмлы бомба

**НАПА́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **наполо́ть**

**НАПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **напа́рить**

**НАПА́РИТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* быҡтырыу, быуҙа (парҙа) бешереү; **напа́рить ре́пы** парҙа шалҡан бешереү **2.** *кого-что*; *разг.* (*в бане*) (һәйбәтләп) сабыу

**НАПА́РИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (һәйбәтләп) сабыныу; **напа́риться в ба́не** мунсала туйғансы сабыныу

**НАПА́РНИК** *м* и **НАПА́РНИЦА** *ж*; *разг.* иш, һыңар, уҙаҡ; **найти́ напа́рника** иш табыу

**НАПА́РЫВАТЬ I** *несов. см.* **напоро́ть** I

**НАПА́РЫВАТЬ II** *несов. см.* **напоро́ть** II 1

**НАПА́РЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **напоро́ться**

**НАПАСА́ТЬ** *несов. см.* **напасти́**

**НАПАСА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напасти́сь** I; **2.** *страд. от* **напаса́ть**

**НАПАСТИ́** *сов. что, чего*; *прост.* (күпмелер) әҙерләп ҡуйыу; **напасти́ на́ зиму проду́ктов** ҡышҡа аҙыҡ-түлек әҙерләп ҡуйыу

**НАПАСТИ́СЬ I** *сов. чего*; *разг.* (*обычно с отриц. "не"*) етерлек әҙерләп ҡуйыу; **на вас не напасёшься еды́** һеҙгә ашарға әҙерләп еткерә алмаҫһың

**НАПАСТИ́СЬ II** *сов.*; *разг.* (көтөүлектә йөрөп) туйғансы ашау; **коро́вы напасли́сь** һыйырҙар көтөүлектә йөрөп ашап туйғандар

**НАПА́СТЬ I** *сов.* **1.** *на кого-что* (*совершить нападение*) һөжүм итеү, ташланыу, яу асыу; **напа́сть на врага́** дошманға һөжүм итеү **2.** *разг.* ябырылыу; **на посе́вы напа́ла саранча́** сәсеүлектәргә саранча ябырылды **3.** *на что*; *разг.* (*с жадностью приняться за что-л.*) ҡомһоҙланып -ға/-гә тотоноу (керешеү) **4.** *на кого*; *разг.* (*придраться*) бәйләнеү, ябырылыу; **оппоне́нты напа́ли на докла́дчика** оппоненттар докладсыға бәйләнде **5.** *на что* (*обнаружить*) төшөү, табыу, тап булыу, осрау, юлығыу; **напа́сть на интере́сную мысль** ҡыҙыҡлы фекергә тап булыу; **напа́сть на след** эҙенә төшөү; **напа́сть на грибы́** бәшмәктәргә осрау **6.** *на кого* (*о каком-л. чувстве, состоянии*) килеү, төшөү, баҫыу; **напа́л страх** ҡурҡыу баҫты; **напа́л сон** йоҡо килде

**НАПА́СТЬ II** *сов. см.* **напа́дать**

**НАПА́СТЬ III** *ж*; *разг.* (*беда*) бәлә, ҡаза, күңелһеҙлек, ҡайғы, бәхетһеҙлек

**НАПАХА́ТЬ** *сов. что, чего* һөрөү, һөрөп ташлау; **напаха́ть пять гекта́ров** биш гектар ер һөрөп ташлау

**НАПА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **напаха́ть**

**НАПА́ЧКАТЬ** *сов.* бысратыу, бысратып бөтөү; **напа́чкать на полу́** иҙәнде бысратып бөтөү

**НАПАЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (металл иретеп) йәбештереү; **напая́ть пласти́нку** ҡурғаш иретеп пластинка йәбештереү **2.** *что, чего* металл иретеп әҙерләү (яһау); **напая́ть се́рьги** металл иретеп алҡа яһау

**НАПЕ́В** *м* көй, моң; **наро́дные напе́вы** халыҡ моңдары

**НАПЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **напе́ть** **2.** *что* и *без доп.* әкрен генә (ауыҙ эсенән генә) көйләү; **напева́ть вполго́лоса** әкрен генә тауыш менән көйләү

**НАПЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напе́ться** **2.** *страд. от* **напева́ть**

**НАПЕ́ВНОСТЬ** *ж* көйлөлөк, моңлолоҡ, яғымлылыҡ; **напе́вность ре́чи** телмәрҙең көйлөлөгө

**НАПЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое көйлө, моңло, яғымлы; **напе́вный го́лос** яғымлы тауыш

**НАПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **напе́чь**

**НАПЕКА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **напека́ть**

**НАПЕРЕБО́Й** *нареч.*; *разг.* кемуҙарҙан, бер-береһен бүлеп (бүлә-бүлә) һөйләү (эшләү); **говори́ть наперебо́й** кемуҙарҙан һөйләү

**НАПЕРЕВЕ́С** *нареч.* алға эйеп; **держа́ть винто́вку наперевéс** винтовканы алға эйеп тотоу

**НАПЕРЕГОНКИ́** и **НАПЕРЕГО́НКИ** *нареч.*; *разг.* кемуҙарҙан, ҡыуышып, уҙышып

**НАПЕРЁД** *нареч.*; *прост.* алдан; **наперёд не угада́ешь** алдан белеп булмай ♦ **за́дом наперёд** алдын артҡа, арты менән алға

**НАПЕРЕКО́Р** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* ҡаршы, кире, ҡаршы барып, оторо арҡыры, киреһенсә, үс итеп; **говори́ть наперeко́р** ҡаршы һөйләү **2.** *предлог с дат. п.* (*вопреки*) ҡаршы, ҡарамаҫтан, үс иткәндәй; **наперeко́р жела́ниям** теләктәргә ҡаршы

**НАПЕРЕРЕ́З** *нареч.* юлына арҡыры сығып (төшөп), юлын ҡыйып (киҫеп, ҡырҡып); **побежа́ть наперерéз** юлына арҡыры сығып йүгереү

**НАПЕРЕ́ТЬ** *сов. на кого-что*; *прост.* этеү; **напере́ть на дверь** ишекте этеү

**НАПЕРЕЧЁТ** *нареч.* **1.** (*целиком, без исключения*) бөтәһен дә, һәммәһен дә, береһен дә ҡалдырмай, тотош; **знать всех наперечёт** бөтәһен дә белеү **2.** *в знач. сказ.* бик аҙ, бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына; **таки́е лю́ди наперечёт** бындай кешеләр бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына

**НАПЕ́РНИК** *м*; *разг.* кәпрән

**НАПЕ́РСНИК** *м* и **НАПЕ́РСНИЦА** *ж*; *уст.* серҙәш

**НАПЁРСТОК** *м* уймаҡ ♦ **с напёрсток** уймаҡтай ғына, бармаҡ башындай ғына, бәп-бәләкәй, бик бәләкәй

**НАПЕРСТЯ́НКА** *ж* уймаҡ сәскә (*үлән*)

**НАПЕ́РЧИВАТЬ** *несов. см.* **напе́рчить**

**НАПЕ́РЧИТЬ** *сов. что* борос һалыу, күп итеп борослау, ныҡ борослау; **напе́рчить суп** ашҡа борос һалыу

**НАПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*передать голосом*); *разг.* көйләп (йырлап) күрһәтеү; **напе́ть пе́сню** йыр йырлап күрһәтеү; **напе́ть моти́в** көйөн көйләп күрһәтеү **2.** (*спеть для звукозаписи*) йырлап яҙҙырыу (*пластинкаға*)

**НАПЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы йырлау, йырлап туйыу, **напе́ться от души́** йәнең теләгәнсе (туйғансы) йырлау

**НАПЕЧА́ТАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* баҫыу, баҫтырыу, баҫып (баҫтырып) сығарыу; **напеча́тать кни́гу** китап баҫыу **2.** *что*; *фото.* сығарыу, яһау; **напеча́тать фотогра́фию** фотография яһау

**НАПЕЧА́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* сығыу, баҫылыу; **рису́нки отчётливо напеча́тались** рәсемдәр асыҡ сыҡҡан **2.** баҫтырып сығарыу, баҫылып сығыу (*мәҡәлә, әҫәр һ.б.*); **напеча́таться в журна́ле** журналда баҫылып сығыу

**НАПЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что, чего* бешереү, бешереп алыу (ҡуйыу); **напе́чь пирого́в** бәлештәр бешереү **2.** *что безл.*; *разг.* эҫе ҡабыу (үтеү), ҡояш һуғыу; **мне напекло́ го́лову** башыма эҫе ҡапты

**НАПИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **напи́ться**

**НАПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **напили́ть**

**НАПИЛИ́ТЬ** *сов. что* бысыу, бысып ҡуйыу (алыу); **напили́ть дров** утын бысып ҡуйыу

**НАПИ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое игәп яһалған (һырланған); **напи́лочная резьба́** игәп һырланған биҙәк

**НАПИ́ЛЬНИК** *м* игәү; **трёхгра́нный напи́льник** өс ҡырлы игәү; **пло́ский напи́льник** яҫы игәү

**НАПИРА́ТЬ** *несов. на кого-что* **1.** *см.* **напере́ть** **2.** *разг.* (*теснить, наступать*) ҡыҫыу, дөрөү, ҡыҫырыҡлау; **напира́ть на проти́вника** дошманды ҡыҫыу **3.** *разг.* (*делать упор*) нык иғтибар итеү, баҫым яһау, баҫым яһап әйтеү (һөйләү); **напира́ть на необходи́мость пое́здки** барыу кәрәклегенә баҫым яһау

**НАПИСА́НИЕ** *с* яҙылыш, яҙылыу; **пра́вильное написа́ние сло́ва** һүҙҙең дөрөҫ яҙылышы

**НАПИСА́ТЬ** *сов. что* **1.** яҙыу, яҙып бөтөрөү (ҡуйыу); **написа́ть письмо́** хат яҙыу **2.** яҙыу, һүрәт төшөрөү (яһау); **написа́ть портре́т** портрет яһау ♦ **на лбу напи́сано** *у кого* маңлайына яҙылған; **на лице́ напи́сано** *у кого* йөҙөнән күренеп тора

**НАПИТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *уст.*, *разг.* (*накормить*) ашатыу, туйҙырыу, туйындырыу; **напита́ть всех** бөтәһен дә ашатыу **2.** *что* (*пропитать*) һеңдереү, туйындырыу, тултырыу

**НАПИТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.*, *шутл.* ашап туйыу **2.** *чем* (үҙенә) һеңдереү, тартыу, һурыу, туйыныу, тулыу; һыуланыу

**НАПИ́ТОК** *м* эсемлек; **прохлади́тельные напи́тки** һалҡын эсемлектәр; **спиртны́е напи́тки** спиртлы эсемлектәр

**НАПИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **напита́ть** 2

**НАПИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напита́ться** 2; **2.** *страд. от* **напи́тывать**

**НАПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чего* и *без доп.* (*утолить жажду*) туйғансы эсеү, һыуһын ҡандырыу; **напи́ться ча́ю** туйғансы сәй эсеү **2.** (*опьянеть*) эсеп иҫереү, иҫергәнсе эсеү

**НАПИХА́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* (теләһә нисек) тығыу, тултырыу, тыңҡыслап тултырыу; **напиха́ть веще́й в чемода́н** сумаҙанға тыңҡыслап әйбер тултырыу

**НАПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **напиха́ть**

**НАПИ́ЧКАТЬ** *сов. кого*; *разг.* **1.** көсләп (ҡыҫтап) ашатыу, кәрәгенән тыш ашатыу; **на-**

**пи́чкать ребёнка конфе́тами** балаға кәрәгенән тыш кәнфит ашатыу **2.** *перен.* артыҡ биреү (башты тултырыу), тылҡыу, тыңҡыу; **напи́чкать сове́тами** артыҡ кәңәштәр биреү

**НАПЛА́В** *м*; *рыб.* ҡалҡыуыс; **про́бковый напла́в** пробка ҡалҡыуыс

**НАПЛА́ВАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (арығансы) йөҙөү, йөҙөп туйыу (арыу)

**НАПЛА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что*; *спец.* өҫтөнә ирегән металл йүгертеү **2.** *что*, *чего* (күпмелер) иретеү, иретеп алыу; **напла́вить о́лова** аҡ ҡурғаш иретеп алыу

**НАПЛА́ВКА** *ж*; *спец. см.* **напла́вить**; **электри́ческая напла́вка** электр ярҙамында иретеп металл йүгертеү

**НАПЛАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **напла́вить**

**НАПЛАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **наплавля́ть**

**НАПЛАВНО́Й,** -ая, -ое йөҙмә; **наплавно́й мост** йөҙмә күпер

**НАПЛА́КАТЬ** *сов.* **1.** (*обычно кратк. ф. прич.*) *разг.* күп илап күҙҙәр ҡыҙарған, шешеп бөткән; **глаза́ напла́каны** күҙҙәр күп илауҙан ҡыҙарған **2.** *что*, *чего*; *прост.* күҙ йәше түгеү; **напла́кать мно́го слёз** күп күҙ йәше түгеү ♦ **кот напла́кал** тырнаҡ осондай, бик аҙ

**НАПЛА́КАТЬСЯ** *сов.* **1.** (бик) күп илау, туйғансы (буҫлыҡҡансы, арығансы) илау, илап туйыу **2.** *разг.* (*получить*, *испытать много неприятностей*) (бик күп) ҡыйынлыҡтар (уңайһыҙ хәлдәр) кисереү

**НАПЛАСТА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* киҫкеләү, тураҡлау; **напласта́ть ры́бу для соле́ния** балыҡты тоҙлау өсөн тураҡлау

**НАПЛАСТОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **напластова́ть**, **напластова́ться** **2.** *геол.* ҡатлам **3.** *перен.* (*наслоение*) үҙенсәлек, сифат (*мәҙәниәттә*, *аңда*, *характерҙа һ.б.*)

**НАПЛАСТОВА́ТЬ** *сов. что* ҡатлау-ҡатлау (ҡат-ҡат) итеп, өҫтө-өҫтөнә һалыу (өйөү, ҡуйыу), ҡатламлау; **напластова́ть зе́млю** ерҙе ҡатламлау

**НАПЛАСТОВА́ТЬСЯ** *сов.* ҡатлам-ҡатлам булып (ҡатлауланып, өҫтө-өҫтөнә) ятыу (өйөләү, ултырыу)

**НАПЛАСТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **напластова́ть**

**НАПЛАСТО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напластова́ться** **2.** *страд. от* **напласто́вывать**

**НАПЛЕВА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое *разг.* һалҡын (иғтибарһыҙ, төкөрөп) ҡарау; **наплева́тельское отноше́ние к де́лу** эшкә һалҡын ҡарау

**НАПЛЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** төкөрөү, төкөрөнөү, төкөрөп бөтөү; **наплева́ть на́ пол** иҙәнгә төкөрөнөү **2.** *перен.*, *прост.* төкөрөү, төкөрөп ҡарау; **наплева́ть на замеча́ние** шелтәгә төкөрөп ҡарау

**НАПЛЕСКА́ТЬ** *сов. что*, *чего* сәсрәтеү, сәсрәтеп (сайпылтып) түгеү (бөтөрөү)

**НАПЛЕСКА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** туйғансы һыу сәсрәтеү; **наплеска́ться в ре́чке** йылғала туйғансы һыу сәсрәтеү **2.** (*налиться*) сайпылып (сәсрәп) түгелеү; **на́ пол наплеска́лась вода́** иҙәнгә һыу сәсрәп түгелгән

**НАПЛЁСКИВАТЬ** *несов. см.* **наплеска́ть**

**НАПЛЁСКИВАТЬСЯ** *несов. см.* **наплеска́ться** 2

**НАПЛЕСТИ́** *сов. что*, *чего* **1.** үреү, үреп яһау (эшләү, ҡуйыу); **наплести́ не́сколько корзи́н** бер нисә кәрзинкә үреп ҡуйыу **2.** *перен.*, *прост.* (*наболтать*) юҡ-бар һөйләү; **наплести́ чепухи́** буш һүҙ һөйләү

**НАПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **наплести́** 1

**НАПЛЕТА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **наплета́ть**

**НАПЛЕ́ЧНИК** *м* иңсә

**НАПЛЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое иңбашҡа һалына торған, иңбаш ...ы; **наплечные ремни́** иңбаш ҡайыштары

**НАПЛОДИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (бик) күп тыуҙырыу, үрсетеү; **наплоди́ть дете́й** күп бала тыуҙырыу

**НАПЛОДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күп тыуыу, үрсеү

**НАПЛУТОВА́ТЬ** *сов.*; *разг.* хәйләләү, алдау

**НАПЛЫ́В** *м* **1.** *см.* **наплы́ть** 3; **2.** ултырма; **наплы́в в до́мне** домна төбөндәге ултырма **3.** *перен.* ағылыу, ағылыш, (күп һанда) килеү; **наплы́в зака́зов** заказдарҙың күп һанда килеүе **4.** *бот.*, *вет.* оро; **наплы́в на де́реве** ағастағы оро; **наплы́в на копы́тах ло́шади** ат тояғындағы оро

**НАПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **наплы́ть**

**НАПЛЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *на кого-что* йөҙөп килеп бәрелеү (менеү); **наплы́ть на ка́мень** йөҙөп килеп ташҡа бәрелеү **2.** *перен.* (*закрыть собой что-л. — о туче*, *облаке и т.п.*) ҡаплау; **ту́ча наплыла́ на со́лнце** болот ҡояшты ҡапланы **3.** (*скопиться в каком-л. количестве*) ағып килеп йыйылыу, ултырыу; **наплы́ло мно́го и́ла** ағып килеп бик күп ләм ултырған

**НАПЛЯСА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) бейеү

**НАПОВА́Л** *нареч.* үлтергәнсе, бер һуғыуҙа, бер атыуҙа; **уби́ть наповал** бер һуғыуҙа үлтереү

**НАПОДО́БИЕ** *предлог с род. п.* (*в виде*, *вроде кого-чего-л.*) оҡшаш(лы), кеүек, һымаҡ, шикелле; **вдалеке́ видне́ется что́-то наподо́бие столба́** алыҫта бағанаға оҡшаш бер нәмә күренә

**НАПОИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* эсереү; **напои́ть ча́ем** сәй эсереү **2.** *кого* (*до опьянения*) иҫерткәнсе эсереү; **напои́ть го́стя** ҡунаҡты иҫерткәнсе эсереү **3.** *обычно в ф. прич.*; *перен.*, *высок.* тулыу, һеңдереү, туйындырыу; **во́здух напоён арома́том цвето́в** һауа сәскәләрҙең хуш еҫе менән тулған

**НАПОКА́З** *нареч.* күрһәтер өсөн, күҙ буяу өсөн; **вы́ставить това́ры напока́з** тауарҙарҙы күрһәтер өсөн сығарып ҡуйыу; **де́лать всё напока́з** һәр нәмәне күҙ буяу өсөн генә эшләү

**НАПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **наползти́**

**НАПОЛЗТИ́** *сов.*; *разг.* **1.** *на кого-что* шыуышып (үрмәләп) барып (килеп) менеү (бәрелеү, төртөлөү), (үрмәләп) инеп тулыу; **муравьи́ наползли́ в варе́нье** ҡырмыҫҡалар ҡайнатмаға инеп тулған; **танк напо́лз на око́пы** танк окоптарға килеп менде **2.** килеп ҡаплау; **тума́н напо́лз на лес** урманды томан ҡапланы

**НАПОЛИРОВА́ТЬ** *сов. что* (ышҡып) ялтыратыу, полировкалау; **наполирова́ть ме́бель** мебелде полировкалау **2.** *что, чего* полировкалап әҙерләү (яһау); **наполирова́ть шкату́лок** полировкалап ҡумталар яһау

**НАПОЛИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **наполирова́ть** 2

**НАПОЛНЕ́НИЕ** *с см.* **напо́лнить — наполня́ть, напо́лниться**; **наполне́ние бо́чек водо́й** мискәләрҙе һыу менән тултырыу; **изме́рить вре́мя наполне́ния ба́ка** бактың тулыу ваҡытын үлсәү

**НАПОЛНИ́ТЕЛЬ** *м* тултырғыс (*машина*); **автомати́ческие наполни́тели** автоматик тултырғыстар

**НАПОЛНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* тултырыу …ы, тултырыу өсөн ҡулланыла торған; **наполни́тельный шланг** тултырыу шлангыһы

**НАПО́ЛНИТЬ** *сов. что* **1.** тултырыу; **напо́лнить корзи́ну гриба́ми** кәрзинде бәшмәк менән тултырыу **2.** *прям., перен.* тулыу; **вода́ напо́лнила я́му** соҡорға һыу тулған; **ра́дость напо́лнила его́ се́рдце** уның йөрәге шатлыҡ менән тулған

**НАПО́ЛНИТЬСЯ** *сов.* тулыу; **глаза́ напо́лнились слеза́ми** күҙҙәр йәш менән тулды

**НАПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **напо́лнить**

**НАПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напо́лниться 2.** *страд. от* **наполня́ть**

**НАПОЛОВИ́НУ** *нареч.* **1.** яртылаш; **со́лнце наполови́ну спря́талось за лес** ҡояш яртылаш урман артына ышыҡланды; **дом пуст наполови́ну** өй яртылаш буш **2.** (*не до конца*) ярты-йорто, ярым-йорто, ярым-ярты, ярым; **де́лать де́ло наполови́ну** ярым-йорто эш эшләү

**НАПОЛОСКА́ТЬ** *сов.*; *разг.* сайҡау, сайҡап алыу; **наполоска́ть го́ру белья́** күп итеп кер сайҡау

**НАПОЛО́ТЬ** *сов. что, чего* утап сығыу (ташлау, ҡуйыу); **наполо́ть мно́го гряд** түтәлдәрҙе утап сығыу

**НАПО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*устанавливаемый на полу*) иҙәнгә ҡуйыла торған; **напо́льная суши́лка** иҙәнгә ҡуйыла торған киптергес **2.** *с.-х.* (*в поле*) ергә ҡуйыла торған; **напо́льная зерносуши́лка** ергә ҡуйыла торған иген киптергес

**НАПОМА́ДИТЬ** *сов. что* помада һөртөү

**НАПОМА́ДИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* помада һөртөнөү

**НАПОМИНА́НИЕ** *с см.* **напомина́ть 2.** иҫкәртмә; **после́днее напомина́ние** һуңғы иҫкәртмә

**НАПОМИНА́ТЬ** *несов. см.* **напо́мнить**

**НАПО́МНИТЬ** *сов.* **1.** *что, о ком-чём* иҫкәртеү, иҫкә (хәтергә) төшөрөү; **напо́мнить о про́шлом** үткәндәрҙе иҫкә төшөрөү **2.** *кого-что* (*быть похожим на кого-что*) хәтерләтеү, иҫенә төшөрөү; **он напо́мнил мне ста́рого дру́га** ул минең элекке дуҫымды хәтерләтте

**НАПО́Р** *м* **1.** баҫым, көс; **напо́р воды́** һыу баҫымы; **напо́р ве́тра** ел көсө **2.** *перен.* баҫым, ҡыҫым, ҡыҫырыҡлау, һөжүм; **напо́р врага́** дошман һөжүме; **под напо́ром подписа́ть догово́р** ҡыҫым аҫтында килешеүгә ҡул ҡуйыу

**НАПО́РИСТОСТЬ** *ж* ныҡышмалылыҡ, тырышлыҡ, ныҡыш булыу; **напо́ристость хара́ктера** характерҙың ныҡышмалылығы

**НАПО́РИСТЫЙ,** -ая, -ое ныҡыш, ныҡышмалы, тырыш; **напо́ристый хара́ктер** ныҡышмалы характер; **напо́ристый ю́ноша** ныҡыш егет

**НАПО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *тех.* ҡыҫым (баҫым) яһау …ы; **напо́рные тру́бы** баҫым яһау торбалары **2.** ҡыҫым (ҙур баҫым) аҫтындағы; **напо́рные во́ды** ҙур баҫым аҫтындағы һыуҙар

**НАПОРО́ТЬ I** *сов. что*; *разг.* (*ранить*) яралау; **напоро́ть но́гу на гвоздь** сөйгә баҫып, аяҡты яралау

**НАПОРО́ТЬ II** *сов. что, чего* **1.** (*распороть*) һүтеү, һүтеп ташлау (биреү, алыу, сығыу, ҡуйыу); **напоро́ть ста́рые пла́тья** иҫке күлдәктәрҙе һүтеп ташлау **2.** *перен., разг.* юҡ-барҙы һөйләп ташлау; **напоро́ть чепухи́** юҡ-бар һөйләп ташлау

**НАПОРО́ТЬСЯ** *сов. на что*; *разг.* **1.** (*повредить*) ҡаҙалыу, төртөлөү, яраланыу; **напоро́ться на гвоздь** сөйгә баҫып яраланыу **2.** *на кого-что*; *перен.* (*наткнуться — о неприятном*) осрау, тап булыу, (өҫтөнә) барып сығыу; **напоро́ться на беду́** бәләгә осрау; **напоро́ться на заса́ду** засадаға тап булыу

**НАПОРОШИ́ТЬ** *сов. чего безл.* (*о снеге*) ҡырпаҡлап (өрпәкләп) яуыу; **напороши́ло сне́гу** аҙ ғына ҡырпаҡлап ҡар яуып үткән

**НАПО́РТИТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что, чего* (*испортить*) боҙоу, боҙоп ташлау (бөтөү, ҡуйыу); **напо́ртить бума́ги** ҡағыҙ боҙоп ташлау **2.** *кому-чему* (*навредить*) зарар (зыян) итеү (килтереү); **напо́ртить де́лу** эшкә зыян килтереү

**НАПОСЛЕ́ДОК** *нареч.*; *разг.* ахырҙа, һуңынан, аҙаҡ килеп, аҙаҡ (ахыр) сиктә; **махну́ть руко́й напосле́док** аҙаҡ сиктә ҡул һелтәү

**НАПО́ЧВЕННЫЙ,** -ая, -ое ер (тупраҡ) өҫтө …ы; **напо́чвенный расти́тельный покро́в** ер өҫтө үҫемлектәре ҡатламы

**НАПРА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что*; *прям., перен.* (*придать направление*) йүнәлтеү, йүнәлдереү, ҡаратып ҡуйыу; **напра́вить ка́тер по ука́занному маршру́ту** катерҙы күрһәтелгән маршрут буйынса йүнәлтеү **2.** (*сосредоточить на ком-чём-л.*)

йүнәлтеү, ҡаратыу; **напра́вить внима́ние на преодоле́ние тру́дностей** иғтибарҙы ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығыуға йүнәлтеү; **напра́вить пу́шки на кре́пость** туптарҙы крепосҡа ҡаратып ҡуйыу **3.** (*нацелить*) *что*; *прям.*, *перен.* төбәү, төҙәү, тоҫҡау, йүнәлтеү; **напра́вить взор** күҙ төбәү; **напра́вить ружьё на неприя́теля** мылтыҡты дошманға тоҫҡау **4.** *что*; *перен.* бороу, ыңғайлатыу, йүнәлтеү; **напра́вить разгово́р на друго́е** һүҙҙе икенсегә бороу **5.** *кого-что* ебәреү; **напра́вить к юри́сту** юрисҡа ебәреү; **напра́вить на рабо́ту** эшкә ебәреү; **напра́вить письмо́ в институ́т** институтҡа хат ебәреү **6.** *что*; *прям.*, *перен.*, *разг.* (*наладить*) көйләү, рәтләү, яйлау, яйға (юлға, рәткә) һалыу (һалып ебәреү); **напра́вить стано́к** станокты рәтләү; **напра́вить рабо́ту** эште юлға һалып ебәреү **7.** *что* (*наточить*) рәтләү, үткерләү, яныу, сарлау, ҡайрау; **напра́вить косу́** салғы яныу ♦ **напра́вить путь (шаги́, стопы́ и т.п.)** йүнәлеү, китеп барыу; **напра́вить на путь и́стины (на и́стинный путь)** *см.* **путь**

**НАПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* йүнәлеү, ыңғайлау, китеү, барыу, юл тотоу, ҡарай китеү; **напра́виться в го́род** ҡалаға юл тотоу

**НАПРАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **напра́вить**; **направле́ние на рабо́ту** эшкә ебәреү **2.** йүнәлеш, яҡ, тараф, табан, ҡарай; **прогресси́вное направле́ние** прогрессив йүнәлеш; **идти́ по направле́нию к реке́** йылғаға табан барыу **3.** *чего*; *перен.* йүнәлеш, ағым; **пра́вильное направле́ние в рабо́те** эштә дөрөҫ йүнәлеш **4.** (*документ*) юллама, йүнәлтмә; **дать направле́ние в больни́цу** хәстәханаға йүнәлтмә биреү

**НАПРА́ВЛЕННОСТЬ** *ж* йүнәлеш, йүнәлгәнлек, маҡсат; **напра́вленность мы́слей** уйҙарҙың йүнәлеше

**НАПРА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **напра́вить 2.** *прил.* йүнәлешле, маҡсатлы, төбәлгән; **напра́вленная во́ля** маҡсатлы ихтыяр **3.** *прил.*; *спец.* билдәле йүнәлештә эшләгән; **напра́вленная анте́нна** билдәле йүнәлештә эшләүсе антенна

**НАПРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **напра́вить**

**НАПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напра́виться 2.** *страд. от* **направля́ть**

**НАПРАВЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **направля́ть 2.** *прил.*; *тех.* йүнәлтеүсе, йүнәлеш биреүсе; **направля́ющий рельс** йүнәлеш биреүсе рельс **3.** *в знач. сущ.* **направля́ющий** *м*; *воен.* башлап барыусы **4.** *в знач. сущ.* **направля́ющая** *ж*; *мат.* йүнәлтеүсе

**НАПРА́ВО** *нареч.* **1.** (*в правую сторону*) уң яҡҡа, уңға (табан); **поверну́ть напра́во** уңға табан боролоу **2.** (*на правой стороне*) уң яҡта, уңда; **напра́во нахо́дится шко́ла** уң яҡта мәктәп ♦ **напра́во и нале́во** ҡарап-нитеп (уйлап-нитеп) тормай, уңға-һулға, ян-яҡҡа, бөтәһенә лә

**НАПРАКТИКОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оҫтарыу, оҫтарып китеү, өйрәнеп алыу, тәжрибә туплау (алыу); **напрактикова́ться в произнесе́нии рече́й** телмәр һөйләргә оҫтарып китеү

**НАПРА́СЛИНА** *ж*; *разг.* нахаҡ, бәлә, яла, ялған, хаҡһыҙға ғәйепләү; **возводи́ть напра́слину** хаҡһыҙға ғәйепләү

**НАПРА́СНО** *нареч.* **1.** юҡҡа, урынһыҙға, бушҡа, файҙаһыҙға, тейешһеҙгә; **напра́сно беспоко́иться** урынһыҙға хафаланыу; **ходи́ть напра́сно** файҙаһыҙға йөрөү **2.** (*зря, во вред себе*) бушҡа, заяға, ерле юҡҡа; **всё бы́ло напра́сно** бөтәһе лә бушҡа ғына

**НАПРА́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*бесполезный*) файҙаһыҙ, файҙаһыҙға; **напра́сное стара́ние** файҙаһыҙға тырышыу **2.** (*безосновательный*) урынһыҙ, нигеҙһеҙ; **напра́сное волне́ние** нигеҙһеҙ тулҡынланыу

**НАПРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напроси́ться 2.** *перен.* килеп тыуыу (сығыу), башҡа килеү; **вы́воды напра́шиваются са́ми собо́й** һығымталар үҙенән-үҙе килеп сыға

**НАПРИМЕ́Р** *вводн. сл.* мәҫәлән

**НАПРОКА́ЗНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* шаярыу, шаянланыу, шуҡланыу

**НАПРОКА́Т** *нареч.* прокатҡа, ваҡытлы файҙаланыуға, ҡуртымға (*хаҡ түләп алыу*); **взять ло́дку напрока́т** прокатҡа кәмә алып тороу

**НАПРОЛЁТ** *нареч.*; *разг.* буйы, буйына, оҙоно, өҙлөкһөҙ; **но́чи напролёт** төндәр буйы(на)

**НАПРОЛО́М** *нареч.*; *разг.* туранан-тура, туп-тура, ҡырып-емереп, ватып-емереп, аңын-тоңон белмәйенсә, иҫәпләшеп тормаҫтан; **идти́ по ле́су напроло́м** урман эсенән туп-тура барыу

**НАПРОПАЛУ́Ю** *нареч.*; *разг.* алдын-артын (аҙағын) уйламай(ынса), уйлап тормай(ынса); **весели́ться напропалу́ю** алдын-артын уйламай күңел асыу

**НАПРОСИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** үтенеү, үтенеп һорау, ризалыҡ алыу, тағылыу; **напроси́ться в го́сти** ҡунаҡҡа килергә үтенеү **2.** *на что* әйтергә мәжбүр итеү, -ттырыу/-ттереү; **напроси́ться на похвалу́** үҙен маҡтаттырыу

**НАПРО́ТИВ** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* ҡаршы, ҡаршыла, ҡаршы яҡта; **он сиде́л напро́тив** ул ҡаршыла ултырҙы **2.** *предлог с род. п.* (*перед кем-чем-л.*) ҡаршыла, ҡаршы яҡта, ҡаршыһында; **напро́тив до́ма** өй ҡаршыһында **3.** *нареч.* (*иначе*, *наоборот*) кире, киреһенсә; **он всё де́лает напро́тив** ул бөтәһен дә киреһенсә эшләй **4.** *в знач. вводн. сл.* (*наоборот*) киреһенсә; **письмо́ его́, напро́тив, бы́ло о́чень коро́ткое** киреһенсә, уның хаты ҡыҫҡа ине **5.** *в знач. частицы* (*наоборот*) киреһенсә

**НА́ПРОЧЬ** *нареч.*; *разг.* бөтөнләй(гә); **забы́ть на́прочь** бөтөнләйгә онотоу

**НАПРУЖИ́НИТЬ** *сов. что*; *разг.* (*напрячь*) киреү, йыйырыу, көсөргәндереү, ҡатырыу; **напружи́нить му́скулы** мускулдарҙы ҡатырыу

**НАПРУЖИ́НИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*напрячься*) кирелеү, йыйырылыу, көсөргәнеү, ҡатыу

**НАПРУ́ЖИТЬ** *сов. что*; *разг.* (*сделать упругим*) (тәнде, мускулды) көсөргәндереү, ҡатырыу, киреү, тартылдырыу; **напру́жить ру́ку** ҡулды көсөргәндереү

**НАПРУ́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*стать упругим*) кирелеү, көсөргәнеү, ҡатыу; **грудь напру́жилась** күкрәк кирелде

**НАПРЫ́ГАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы һикереү (ырғыу, һикеренеү), һикереп (ырғып, һикеренеп) туйыу

**НАПРЫ́СКАТЬ** *сов. что*; *разг.* бөркөү, һибеү, сәсрәтеү; **напры́скать бельё водо́й** кергә һыу бөркөү; **напры́скать воды́ на́ пол** иҙәнгә һыу сәсрәтеү

**НАПРЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **напры́скать**

**НАПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **напря́чь**

**НАПРЯГА́ТЬСЯ** *несов.* **1** *см.* **напря́чься** **2.** *страд. от* **напряга́ть**

**НАПРЯЖЕ́НИЕ** *с.* **1.** *см.* **напря́чь — напряга́ть, напря́чься**; **напряже́ние го́лоса** тауыш(ты) көсәйтеү **2.** көсөргәнеш, көс һалыу, ҡыйынлыҡ; **рабо́тать с напряже́нием** көсөргәнеш менән эшләү; **возни́кло напряже́ние с тра́нспортом** транспорт менән ҡыйынлыҡ килеп сыҡты **3.** *физ.*, *тех.* көсөргәнеш; **ток высо́кого напряже́ния** юғары көсөргәнешле ток

**НАПРЯЖЁННОСТЬ** *ж* көсөргәнешлек, ҡырҡыулыҡ, киҫкенлек; **ослабле́ние междунаро́дной напряжённости** халыҡ-ара көсөргәнешлектең йомшарыуы

**НАПРЯЖЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **напря́чь** **2.** *прил.* көсөргәнешле; **напряжённая рабо́та** көсөргәнешле эш **3.** *прил.* ҡырҡыу, киҫкен; **напряжённые отноше́ния** киҫкен мөнәсәбәт

**НАПРЯМИ́К** *нареч.*; *разг.* **1.** тура, түтә, туп-тура, туранан-тура; **вы́йти к реке́ напрями́к че́рез лес** йылғаға урман аша тура сығыу **2.** *перен.* асыҡтан-асыҡ, туранан-тура, тура; **сказа́ть напрями́к** туранан-тура әйтеү

**НАПРЯМУ́Ю** *нареч.*; *разг. см.* **напрями́к**; **идти́ к па́секе напряму́ю** умарталыҡҡа туп-тура барыу; **сказа́ть напряму́ю** туранан-тура әйтеү

**НАПРЯ́СТЬ** *сов. что, чего* иләү, иләп бөтөү (алыу, ҡуйыу); **напря́сть клубо́к ше́рсти** бер йомғаҡ йөн иләп ҡуйыу

**НАПРЯ́ЧЬ** *сов. что* **1.** киреү, тартылдырыу, йыйырыу, көсөргәндереү, ҡатырыу; **напря́чь му́скулы** мускулдарҙы көсөргәндереү; **напря́чь паруса́** елкәндәрҙе киреү **2.** *перен.* көсәйтеү, туплау; **напря́чь внима́ние** иғтибарҙы көсәйтеү

**НАПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** тызырайыу, тартылыу, йыйырылыу, көсөргәнеү; **ле́ска напрягла́сь** ҡармаҡ ебе тартылды **2.** (*собрать все свои силы*) көсәнеү; **напря́чься, поднима́я груз** көсәнеп йөк күтәреү

**НАПУГА́ТЬ** *сов. кого-что* ҡурҡытыу, өркөтөү, шөрләтеү, ҡот осороу (алыу); **напуга́ть, расска́зывая у́жасы** ҡот осҡос нәмәләр һөйләп ҡурҡытыу

**НАПУГА́ТЬСЯ** *сов.* ҡурҡыу, өркөү, шөрләү, ҡот осоу (алыныу); **напуга́ться до́ сме́рти** ҡот алыныу

**НАПУ́ДРИВАТЬ** *несов. см.* **напу́дрить**

**НАПУ́ДРИТЬ** *сов. кого-что* пудралау, пудра һөртөү

**НАПУ́ДРИТЬСЯ** *сов.* пудра һөртөнөү

**НАПУ́ЛЬСНИК** *м* беләҙек бәйләмесе, беләксә

**НАПУСКНО́Й,** -ая, -ое яһалма, ялған, хәйләле; **напускно́е споко́йствие** яһалма тыныслыҡ

**НАПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ебәреү, индереү, тултырыу, ағыҙыу; **напусти́ть в ва́нну воды́** ҡорнаға һыу ағыҙыу **2.** *что* (*опустить*) төшөрөү; **напусти́ть во́лосы на лоб** сәстәрҙе маңлайға төшөрөү **3.** *разг.* (*на себя*) булып ҡыланыу, итеп күрһәтеү; **напусти́ть на себя́ стро́гость** ҡаты булып ҡыланыу **4.** *кого-что*; *прям.*, *перен.*, *разг.* һөсләтеү, ҡотортоу, һөсләтеп ебәреү; **напусти́ть соба́к на зве́ря** эттәрҙе кейеккә һөсләтеп ебәреү ♦ **напусти́ть стра́ху** *на кого* ҡурҡытыу, ҡотон алыу; **напусти́ть тума́ну** юрый бутау, саң осороу, төтөн ебәреү

**НАПУСТИ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что*; *разг.* (әйтеп) ташла(ны)у, ҡысҡырып (екеренеп) ташла(ны)у; **напусти́ться с упрёками** үпкә һүҙҙәре әйтеп ташланыу

**НАПУ́ТАТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что, чего* сыуалтыу, сыуалтып (сеймәлтеп, симәлдереп) бөтөрөү; **напу́тать ни́ток** ептәрҙе сыуалтып бөтөрөү **2.** бутау, бутап бөтөрөү, хата ебәреү; **напу́тать в дела́х** эштәрҙе бутап бөтөрөү

**НАПУ́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* сыуалыу, сыуалып бөтөү; **ни́тки напу́тались** ептәр сыуалып бөткән

**НАПУ́ТСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое юл …ы, оҙатыу …ы; **напу́тственные слова́** юл теләктәре

**НАПУ́ТСТВИЕ** *с* оҙатыу һүҙҙәре, юл теләктәре (*юлға сығыусыға йәки яңы эш башлап ебәреүсегә әйтелә*); **напу́тствие во́инам** яугирҙарға оҙатыу һүҙҙәре

**НАПУ́ТСТВОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого* и *без доп.* хәйерле юл теләп ҡалыу, өгөт-нәсихәт әйтеп оҙатыу; **напу́тствовать молоды́х** йәштәрҙе өгөт-нәсихәт әйтеп оҙатыу

**НАПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **напу́тать** 1

**НАПУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **напу́таться** **2.** *страд. от* **напу́тывать**

**НАПУХА́ТЬ** *несов. см.* **напу́хнуть**

**НАПУ́ХНУТЬ** *сов.*; *разг. см.* **опу́хнуть**

**НАПЫ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **напы́житься**

**НАПЫ́ЖИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*напрячься*) көсәнеү, тызрайыу, тартылыу; **напы́житься,**

**поднима́я груз** көсәнеп йөк күтәреү **2.** (*о птицах*) ҡабарыныу; **индю́к напы́жился** күркә ҡабарынды **3.** *перен.* (*принять важный вид*) ҡуҡырайыу, кәпәренеү, тәкәбберләнеү, ҡабарыныу; **напы́житься как пету́х** әтәс кеүек ҡабарыныу

**НАПЫЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* туҙан (саң) туҙҙырыу (борҡотоу, сығарыу), туҙанлау, саңлау; **напыли́ть в коридо́ре** коридорҙа туҙан туҙҙырыу; **напыли́ть оде́жду** кейемде туҙанлау

**НАПЫ́ЩЕННОСТЬ** *ж* **1.** тәкәбберлек, эрелек, һауалылыҡ; **напы́щенность ви́да** ҡиәфәттең тәкәбберлеге **2.** ҡабарынҡылыҡ; **напы́щенность ре́чи** телмәрҙең (һүҙҙәрҙең) ҡабарынҡылығы

**НАПЫ́ЩЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*высокомерный*) эре, һауалы, фырт, кәпәренгән, тәкәббер; **напы́щенный вид** тәкәббер ҡиәфәт **2.** (*высокопарный — о речи*) ҡабарынҡы; **напы́щенный стиль** ҡабарынҡы стиль

**НАПЯ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **напя́лить**

**НАПЯ́ЛИТЬ** *сов. что* **1.** (*натянуть на пяльцы*) киргегә киреү (тартыу); **напя́лить ткань на пя́льцы** туҡыманы киргегә киреү **2.** тарта-һуҙа кейеү (*гәҙәттә, тар нәмәне*); **напя́лить ку́ртку на ва́тник** һырма өҫтөнән тарта-һуҙа куртка кейеп алыу

**НАРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **нарабо́тать**

**НАРАБА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нарабо́таться 2.** *страд. от* **нараба́тывать**

**НАРАБО́ТАТЬ** *сов. что*; *разг.* (*заработать*) эшләп табыу (алыу); **нарабо́тать де́нег** аҡса эшләп табыу

**НАРАБО́ТАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*много работать*) туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) эшләү

**НАРАВНЕ́** *нареч.* **1.** (*на равных правах*) бер тиң (тигеҙ), типә-тиң, тип-тигеҙ, бер үк дәрәжәлә (кимәлдә); **идти́ наравне́ с сосе́дом** күрше менән бер тиң барыу; **рабо́тать наравне́ со взро́слыми** ололар менән бер тигеҙ эшләү **2.** (*одинаково*) берҙәй, кеүек үк, һымаҡ, төҫлө

**НАРА́ДОВАТЬСЯ** *сов. на кого-что* и *без доп.* (*с "не" и "мочь"*) ныҡ шатланыу, ҡыуаныу; **не нара́доваться** шатланып туя алмау

**НАРАСПА́ШКУ** *нареч.*; *разг.* елбәгәй, элмәйенсә, элмәгән көйө; **он шёл в пальто́ нараспа́шку** ул пальтоһын элмәйенсә китеп бара ине ♦ **душа́ нараспа́шку** асыҡ күңелле, ябай

**НАРАСПЕ́В** *нареч.* һуҙып-һуҙып, һамаҡлап, көйләп, көйләгән һымаҡ; **чита́ть нараспе́в** көйләп уҡыу

**НАРАССКАЗА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* (нимәлер) күп һөйләү; **он мно́го нарассказа́л ди́вного** ул бик күп ғәжәп нәмәләр һөйләне

**НАРАСТА́НИЕ** *с см.* **нараста́ть**; **нараста́ние зву́ка** тауыштың көсәйә барыуы

**НАРАСТА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **нарасти́ 2.** (*усиливаться, увеличиваться*) көсәйә (үҫә, арта) барыу; **бли́же к реке́ шум нараста́л** йылғаға яҡынлашҡан һайын тауыш көсәйә барҙы

**НАРАСТИ́** *сов.* **1.** (*вырасти на поверхности чего-л.*) үҫеп сығыу, ҡаплау; **на камня́х наро́с мох** таш өҫтөн мүк ҡаплаған; **наросло́ мно́го грибо́в** бик күп бәшмәк үҫеп сыҡҡан **2.** *перен.* артыу, өҫтәлеү, йыйылыу; **наросли́ проце́нты** проценттар артҡан

**НАРАСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* үҫтереү; **нарасти́ть му́скулы** мускулдарҙы үҫтереү **2.** *что* ялғап оҙайтыу (оҙонайтыу); **нарасти́ть верёвку** бауҙы ялғап оҙонайтыу **3.** *что*; *разг.* (күп итеп) үҫтереү; **нарасти́ть мно́го овоще́й** күп итеп йәшелсә үҫтереү **4.** *что*; *разг.* арттырыу, өҫтәү; **нарасти́ть темп** темпты арттырыу

**НАРАСХВА́Т** *нареч.*; *разг.* **1.** кемуҙарҙан, тартҡылашып, дәррәү, бик тиҙ арала (ваҡытта); **биле́ты бра́лись нарасхва́т** билеттар бик тиҙ арала һатылып бөттө **2.** *в знач. сказ.* етмәй, аҙ, етешмәй; **де́тские игру́шки нарасхва́т** балалар уйынсыҡтары етешмәй

**НАРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **нарасти́ть 2.** артҡан өлөш; **нараще́ние от вло́женных в ка́ссу де́нег** кассаға һалынған аҡсаның артҡан өлөшө

**НАРА́ЩИВАНИЕ** *с см.* **нара́щивать**; **нара́щивание экономи́ческой мо́щи** иҡтисади ҡеүәтте арттырыу

**НАРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **нарасти́ть**

**НАРА́ЩИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** артыу, үҫеү, арта барыу; **нара́щиваются мо́щности дви́гателей** двигателдәрҙең ҡеүәте арта бара **2.** *страд. от* **нара́щивать**

**НАРВА́Л** *м* һыңар мөгөҙ (*һирәк осрай торған диңгеҙ хайуаны*)

**НАРВА́ТЬ I** *сов. что, чего* **1.** (*сорвать*) өҙөп (йолҡоп) алыу, йыйыу; **нарва́ть цвето́в** сәскәләр өҙөп алыу **2.** (*разорвать*) йыртыу, йыртып ташлау, йыртҡылау; **нарва́ть во́рох нену́жной бума́ги** бер өйөм кәрәкһеҙ ҡағыҙҙы йыртып ташлау ♦ **нарва́ть у́ши** *кому* ҡолағын бороу

**НАРВА́ТЬ II** *сов.* эренләү, эрен йыйыу; **у меня́ па́лец нарва́л** минең бармағым шешеп эренләгән

**НАРВА́ТЬСЯ** *сов. на кого*; *разг.* осрау, тап булыу, тура килеү, өҫтөнә барып сығыу, килеп (барып) эләгеү (ҡабыу); **нарва́ться на заса́ду** боҫҡонға барып эләгеү; **нарва́ться на неприя́тности** күңелһеҙ хәлгә осрау

**НАРД** *м* нард (*еҫле тамырлы үлән һәм уның тамырынан яһалған хуш еҫле матдә*)

**НА́РДОВЫЙ,** -ая, -ое нард ...ы; **на́рдовое ма́сло** нард майы

**НАРЕВЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* илау, туйғансы илау, илап туйыу; **нареве́ться до утомле́ния** арығансы илау

**НАРЕ́З** *м* киртләс, киртмә, борма, һыр; **винтово́й наре́з** винт һыры

**НАРЕЗА́НИЕ** *с см.* **нареза́ть**; **нареза́ние бума́ги** ҡағыҙ киҫеү

**НАРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего* киҫеү, ҡырҡыу, турау, телеү; **наре́зать мя́са** ит турау; **наре́зать хле́ба** икмәк телеү; **наре́зать бума́ги** ҡағыҙ ҡырҡыу **2.** *что*, *чего* ҡырҡып әҙерләү, әҙерләп ҡуйыу; **наре́зать буке́т цвето́в** сәскәләр ҡырҡып гөлләмә яһау; **наре́зать ве́ток** ботаҡтар ҡырҡып әҙерләп ҡуйыу **3.** *что*, *чего* (*разделить на участки*) бүлеү, бүлеп биреү, киҫеү, ҡырҡыу; **наре́зать земли́** ер бүлеп биреү **4.** *что*, *кого-чего* (*зарезать*) һуйыу, салыу; **наре́зать кур** тауыҡтар салыу **5.** *что*; *тех.* (*сделать нарезы*, *резьбу*) бормалау, һырлау; **наре́зать винт** винт һырлау **6.** (*причинить боль давлением*, *трением*) ҡырҡыу; **ремни́ кото́мки наре́зали пле́чи** артмаҡтың ҡайыш бауҙары иңбаштарҙы ҡырҡты

**НАРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **наре́зать** 1—3, 5, 6

**НАРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *прост.* эсеп иҫереү

**НАРЕЗА́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **нареза́ть**

**НАРЕЗА́ТЬСЯ II** *несов. см.* **наре́заться**

**НАРЕ́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **наре́зать**; **наре́зка винто́в** винт һырҙары яһау; **наре́зка уча́стков** участкалар бүлеп биреү **2.** *тех.* һыр; **наре́зка ствола́ ору́дия** туп көбәгенең һыры

**НАРЕЗНО́Й,** -ая, -ое һырлы, киртмәле, киртләсле, бормалы; **нарезна́я часть ствола́** көбәктең һырлы өлөшө

**НАРЕ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **наре́зать** 1—3, 5, 6

**НАРЕ́ЗЫВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **наре́зывать**

**НАРЕ́ЗЫВАТЬСЯ II** *несов. см.* **наре́заться**

**НАРЕКА́НИЕ** *с* әр, шелтә; **справедли́вое нарека́ние** дөрөҫ шелтә

**НАРЕКА́ТЬ** *несов. см.* **наре́чь**

**НАРЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наре́чься** **2.** *страд. от* **нарека́ть**

**НАРЕ́ЧИЕ I** *с*; *лингв.* һөйләш

**НАРЕ́ЧИЕ II** *с*; *грам.* рәүеш

**НАРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* рәүешле, рәүеш ...ы; **наре́чное словосочета́ние** рәүеш һүҙбәйләнеше

**НАРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что*; *уст.* исем ҡушыу (биреү), атау

**НАРЕ́ЧЬСЯ** *сов.*; *уст.* исемләнеү, исем алыу, аталыу

**НАРЗА́Н** *м* нарзан (*минераль һыу*); **пить нарза́н** нарзан эсеү

**НАРЗА́ННЫЙ,** -ая, -ое нарзан ...ы, нарзанлы; **нарза́нный исто́чник** нарзан сығанағы; **нарза́нные ва́нны** нарзанлы ванна

**НАРИСОВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һүрәт төшөрөү (яһау); **нарисова́ть буке́т цвето́в** сәскәләр гөлләмәһе төшөрөү **2.** *перен.* (*образно описать*) тасуирлау, кәүҙәләндереү, сағылдырыу, һүрәтләү; **нарисова́ть бу́дущую жизнь** киләсәк тормошто һүрәтләү

**НАРИСОВА́ТЬСЯ** *сов. безл.* (*образно представиться*) һүрәтләнеү, кәүҙәләнеү, күҙ алдына килеп баҫыу; **ему́ нарисова́лось лицо́ ма́тери** уның күҙ алдына әсәһенең йөҙө килеп баҫты

**НАРИЦА́ТЕЛЬНЫЙ: и́мя нарица́тельное** *грам.* уртаҡлыҡ исем; **нарица́тельная сто́имость** *эк.* аҡсаның үҙендә күрһәтелгән хаҡы

**НАРКО́З** *м*; *мед.* наркоз; **дать нарко́з** наркоз биреү

**НАРКО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое наркоз итеп ҡулланыла торған; **нарко́зное сре́дство** наркоз итеп ҡулланыла торған дарыу

**НАРКО́ЛОГ** *м*; *мед.* нарколог, наркология белгесе (*табип*)

**НАРКОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое наркология ...ы; **наркологи́ческий кабине́т** наркология кабинеты

**НАРКОЛО́ГИЯ** *ж* наркология (*медицинаның бер бүлеге*)

**НАРКО́М** *м* (*народный комиссар*) нарком (*халыҡ комиссары*)

**НАРКОМА́Н** *м* и **НАРКОМА́НКА** *ж* наркоман; **лечи́ть наркома́на** наркоманды дауалау

**НАРКОМА́НИЯ** *ж* наркомания (*наркотиктар ҡулланыу менән мауығыуҙан ауырыу*); **борьба́ с наркома́нией** наркоманияға ҡаршы көрәш

**НАРКОМА́Т** *м* (*народный комиссариат*) наркомат (*халыҡ комиссариаты*)

**НАРКОТИЗА́ТОР** *м*; *мед.* наркозлаусы, наркоз ебәреүсе белгес

**НАРКОТИЗА́ЦИЯ** *ж*; *мед. см.* **наркотизи́ровать**

**НАРКОТИЗИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого*; *мед.* наркозлау, наркоз ебәреү

**НАРКОТИЗИ́РОВАТЬСЯ** *мед.* **1.** *сов.*, *несов.* наркозланыу, наркоз йоғонтоһона инеү **2.** *только несов. страд. от* **наркотизи́ровать**

**НАРКО́ТИКИ** *мн.* (*ед.* **нарко́тик** *м*) наркотик(тар) (*иҫһеҙләндергес матдәләр — медицинала һыҙлауҙы баҫыу йәки йоҡлатыу өсөн дарыу итеп ҡулланыла*)

**НАРКОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое наркотик, наркотик ...ы; **наркоти́ческое де́йствие** наркотик йоғонтоһо; **наркоти́ческие сре́дства** наркотик матдәләр

**НАРО́Д** *м*; *в разн. знач.* халыҡ; **наро́ды всей плане́ты** бөтә планета халҡы; **башки́рский наро́д** башҡорт халҡы; **на у́лице собрало́сь мно́го наро́ду** урамда бик күп халыҡ йыйылды

**НАРОДИ́ТЬ** *сов. что*, *кого-чего*; *разг.* (күп) бала табыу

**НАРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*родиться и вырасти*) тыуып үҫеү **2.** *перен.* (*появиться*, *возникнуть*) барлыҡҡа килеү, килеп тыуыу; **народи́лась наде́жда** ышаныс килеп тыуҙы **3.** *разг.* (*уродиться*) күп булыу, уңыу; **ны́нче народи́лось мно́го ви́шни** быйыл сейә ныҡ уңды

**НАРО́ДНИК** *м*; *ист.* народник, халыҡсы (*народниклыҡ юлынан барыусы*)

**НАРО́ДНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *ист.* народниклыҡ ...ы, халыҡсылыҡ ...ы, народниктар ...ы; **наро́днические взгля́ды** халыҡсылыҡ ҡараш(тар)ы

**НАРО́ДНИЧЕСТВО** *с*; *ист.* народниклыҡ, халыҡсылыҡ (*ижтимағи-сәйәси хәрәкәт*)

**НАРО́ДНО-ДЕМОКРАТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое халыҡ демократияһы ...ы; **наро́дно-демократи́ческая респу́блика** халыҡ демократияһы республикаһы

**НАРО́ДНОСТЬ** *ж* **1.** халыҡ; **наро́дности Восто́ка** Көнсығыш халыҡтары **2.** халыҡсанлыҡ; **наро́дность произведе́ния** әҫәрҙең халыҡсанлығы

**НАРОДНОХОЗЯ́ЙСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое халыҡ хужалығы ...ы; **народнохозя́йственный план** халыҡ хужалығы планы

**НАРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** халыҡ ...ы; **наро́дное тво́рчество** халыҡ ижады; **наро́дный арти́ст** халыҡ артисы **2.** халыҡсан; **поэ́зия М.Кари́ма наро́дна** М.Кәримдең поэзияһы халыҡсан

**НАРОДОВО́ЛЕЦ** *м*; *ист.* народоволец ("*Народная воля" ойошмаһының ағзаһы*)

**НАРОДОНАСЕЛЕ́НИЕ** *с* бер ил халҡы, бер илдә йәшәүсе халыҡтың һаны; **увеличе́ние народонаселе́ния страны́** илдәге халыҡ һанының артыуы

**НАРОЖА́ТЬ** *сов. что*; *разг. см.* **народи́ть**

**НАРОЖДА́ТЬСЯ** *несов. см.* **народи́ться**

**НАРОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **народи́ться** 2; **нарожде́ние наде́жды** ышаныс тыуыу

**НАРО́СТ** *м* **1.** ҡатлам; **ледяны́е наро́сты** боҙ ҡатламдары **2.** (*на растениях*) оро, бирес; **наро́ст на стволе́ де́рева** ағас олонондағы оро

**НАРОЧИ́ТО** *нареч.* юрамал, яһалма; **груби́ть нарочи́то** юрамал тупаҫлыҡ күрһәтеү

**НАРОЧИ́ТОСТЬ** *ж* яһалмалылыҡ, юрамал (белә тора) эшләү; **нарочи́тость посту́пков** ҡылыныштарҙың яһалмалылығы

**НАРОЧИ́ТЫЙ,** -ая, -ое юрамал эшләнгән, яһалма; **нарочи́тая хо́лодность** яһалма һалҡынлыҡ

**НАРО́ЧНО** *нареч.* **1.** (*намеренно*) юрамал, күрәләтә, белә-күрә; **наро́чно оклевета́ть неви́нного челове́ка** күрәләтә ғәйепһеҙ кешегә яла яғыу **2.** (*назло*) юрый, асыу (хаслыҡ, үс) итеп; **он меня́ наро́чно подвёл** ул мине юрый уңайһыҙ хәлгә ҡалдырҙы **3.** *разг.* (*для видимости*) шаярып (уйнап) ҡына, юрый ғына; **наро́чно прики́нуться больны́м** юрый ғына сирле булып ҡыланыу

**НА́РОЧНЫЙ** *м* сапҡын(сы) (*ашығыс хәбәр йәки йомош менән ебәрелгән кеше*)

**НАРСУ́Д** *м* (*народный суд*) халыҡ суды

**НА́РТЕННЫЙ** и **НА́РТОВЫЙ,** -ая, -ое нарта ...ы; **на́ртенные поло́зья** нарта табаны; **на́ртовая доро́га** нарта юлы

**НА́РТЫ** *мн.* (*ед.* **на́рта** *ж*) нарта (*болан йәки эт егеп йөрөй торған сана*)

**НАРУБА́ТЬ** *несов. см.* **наруби́ть**

**НАРУБИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** ҡырҡыу, киҫеү, (күпмелер) ҡырҡып (киҫеп) ташлау; **наруби́ть ве́ток** күп ботаҡтар киҫеп ташлау **2.** (*выдолбить*) уйып (киҫеп) яһау, тишеп (соҡоп) алыу; **наруби́ть в скале́ ступе́ни** ҡаяны киҫеп баҫҡыстар яһау

**НАРУ́БКА** *ж* **1.** *см.* **наруби́ть**; **нару́бка ле́са** урман ҡырҡыу **2.** билге, тамға, киртек; **де́лать нару́бки топоро́м** балта менән билге һалыу

**НАРУГА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* туйғансы тиргәшеү (әрләшеү)

**НАРУ́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** (*внешность кого-л.*) ҡиәфәт, сырай, төҫ; **нару́жность отца́** атайҙың төҫө **2.** (*внешний вид чего-л.*) тышҡы күренеш, тышҡы яҡ; **нару́жность до́ма** йорттоң тышҡы яғы

**НАРУ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тышҡы; **нару́жная сторона́ окна́** тәҙрәнең тышҡы яғы; **нару́жное схо́дство** тышҡы оҡшашлыҡ **2.** *перен.* яһалма, тыштан ғына булған; **нару́жная ра́дость** яһалма шатлыҡ **3.** *в знач. сущ.* **нару́жное** *с*; *мед.* ыуыныу (һөртөнөү) дарыуы

**НАРУ́ЖУ** *нареч.* тышҡы, тышҡы яҡҡа, өҫкә; **ключ торчи́т нару́жу** асҡыс ишектең тышҡы яғына сығып тора; **мышь вы́лезла из норы́ нару́жу** сысҡан ояһынан тышҡа сыҡҡан ♦ **весь (вся) нару́жу** *с кем* и *без доп.*; **всё нару́жу** *у кого* и *без доп.* эсендәге тышында

**НАРУКА́ВНИК** *м* еңсә; **ко́жаные нарука́вники** күн еңсәләр

**НАРУКА́ВНЫЙ,** -ая, -ое ең(дәге), еңгә беркетелә торған, еңгә (бәйләп) ҡуйыла торған; **нарука́вная повя́зка** еңгә бәйләп ҡуйыла торған таҫма

**НАРУМЯ́НИВАТЬ** *несов. см.* **нарумя́нить**

**НАРУМЯ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нарумя́ниться 2.** *страд. от* **нарумя́нивать**

**НАРУМЯ́НИТЬ** *сов. что.* **1.** ҡыҙартыу, алһыуландырыу; **зи́мний во́здух нарумя́нил её лицо́** ҡышҡы һауа уның йөҙөн алһыуландырған **2.** (*покрыть румянами*) һандал (инлек) һөртөү (яғыу), һандал (инлек) һөртөп алһыуландырыу; **нарумя́нить щёки** биткә һандал һөртөү

**НАРУМЯ́НИТЬСЯ** *сов.* һандал (инлек) һөртөнөү (буяныу)

**НАРУ́ЧНИКИ** *мн.* (*ед.* **нару́чник** *м*) ҡул бығауы

**НАРУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡул ...ы; **нару́чные часы́** ҡул сәғәте

**НАРУША́ТЬ** *несов. см.* **нару́шить**

**НАРУША́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **наруша́ть**

**НАРУШЕ́НИЕ** *с см.* **нару́шить**, **нару́шиться**; **наруше́ние дисципли́ны** тәртип боҙоу; **наруше́ние кровообраще́ния** ҡан әйләнешенең боҙолоуы

**НАРУШИ́ТЕЛЬ** *м* боҙоусы; **наруши́тель дисципли́ны** тәртип боҙоусы

**НАРУ́ШИТЬ** *сов. что* боҙоу, бүлдереү; **нару́шить соглаше́ние** килешеүҙе боҙоу; **нару́шить сон** йоҡоно бүлдереү; **нару́шить ход мы́слей** фекер ағышын бүлдереү

**НАРУ́ШИТЬСЯ** *сов.* боҙолоу, бүленеү, осоу; **нару́шился обме́н веще́ств** матдәләр алышыныуы боҙолған; **нару́шился сон** йоҡо осто

**НАРЦИ́СС** *м* нәркәс (*гөл*)

**НАРЦИ́ССОВЫЙ,** -ая, -ое нәркәс ...ы; **нарци́ссовая лу́ковица** нәркәс һуған(баш)ы

**НА́РЫ** *только мн.* һике, урындыҡ

**НАРЫ́В** *м* эренле шеш, күпертке

**НАРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **нары́ть**

**НАРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **нарва́ть** II

**НАРЫВА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **нарва́ться**

**НАРЫВА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **нарыва́ть** I

**НАРЫВНО́Й** и **НАРЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое эрен һурҙыра (йыйҙыра) торған; **нарывно́й пла́стырь** эрен һурҙыра торған пластырь

**НАРЫ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** ҡаҙыу, ҡаҙып (соҡоп) ташлау; **нары́ть не́сколько ям** бер нисә соҡор ҡаҙып ташлау **2.** ҡаҙып (соҡоп) алыу; **нары́ть мешо́к карто́феля** бер тоҡ картуф ҡаҙып алыу

**НАРЯ́Д I** *м* (ҡупшы) кейем, кейем-һалым; **дороги́е наря́ды** ҡыйбатлы кейемдәр

**НАРЯ́Д II** *м*; *в разн. знач.* наряд; **наря́д мили́ции** милиция наряды (*төркөм*); **быть в наря́де** нарядта булыу (*хеҙмәт*); **вы́писать наря́д на доста́вку това́ров** тауар килтереү өсөн наряд яҙҙырып алыу (*ҡағыҙ*); **дать наря́д на рабо́ту** эшкә наряд биреү (*бойороҡ, күрһәтмә*)

**НАРЯДИ́ТЬ I** *сов. кого-что* **1.** (*красиво одеть*) ҡупшы (матур) итеп кейендереү, биҙәү, кейҙереү; **наряди́ть в парчу́ и ба́рхат** барса һәм бәрхәт кейемдәргә ҡупшы итеп кейендереү; **наряди́ть в тёплую оде́жду** йылы кейем кейҙереү **2.** *кем* оҡшатып кейендереү, итеп кейендереү; **наряди́ть кло́уном** клоун итеп кейендереү

**НАРЯДИ́ТЬ II** *сов. кого-что* (*дать наряд*) билдәләү, тәғәйенләү, ебәреү, билдәләп (тәғәйенләп) ҡуйыу (ебәреү), итеп ҡуйыу; **наряди́ть в лес собира́ть я́годы** урманға еләк йыйырға ебәреү; **наряди́ть в карау́л** ҡарауылға ҡуйыу

**НАРЯДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*нарядно одеться*) ҡупшы кейенеү, кейенеү-яһаныу, кейенеү-биҙәнеү; **наряди́ться как ку́кла** ҡурсаҡ кеүек ҡупшы кейенеү **2.** *разг.* кейеү; **наряди́ться в ста́рую оде́жду** иҫке кейем кейеү **3.** *кем* булып кейенеү; **наряди́ться кло́уном** клоун булып кейенеү

**НАРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡупшы, ҡупшы (матур) итеп кейенгән; **наря́дная де́вушка** ҡупшы (итеп) кейенгән ҡыҙ **2.** ҡупшы, зиннәтле, матур, ҡупшы (матур) итеп биҙәлгән; **наря́дная ёлка** матур итеп биҙәлгән шыршы; **наря́дная ко́фта** матур кофта

**НАРЯДУ́** *нареч. с кем-чем* бер рәттән, менән бергә, кеүек үк, һымаҡ уҡ, бер тигеҙ (тиң); **наряду́ с э́тим** ошоноң менән бергә; **рабо́тать наряду́ со взро́слыми** ололар менән бер рәттән эшләү

**НАРЯ́ДЧИК** *м* и **НАРЯ́ДЧИЦА** *ж* нарядсы, нарядка ебәреүсе (билдәләүсе), эшкә ебәреүсе; **наря́дчик автоба́зы** автобаза нарядсыһы

**НАРЯЖА́ТЬ I** *несов. см.* **наряди́ть** I

**НАРЯЖА́ТЬ II** *несов. см.* **наряди́ть** II

**НАРЯЖА́ТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **наряди́ться 2.** *страд. от* **наряжа́ть** I

**НАРЯЖА́ТЬСЯ II** *несов. страд. от* **наряжа́ть** II

**НАСАДИ́ТЬ I** *сов. что* ултыртыу; **насади́ть мно́го берёз** (күпләп) ҡайындар ултыртыу

**НАСАДИ́ТЬ II** *сов. что.* **1.** *что* (*надеть*) һаплау; **насади́ть топо́р на топори́ще** балта һаплау **2.** *кого-что, кого-чего* кейҙереү, ҡатыу, ҡаҙау; **насади́ть о́бруч на бо́чку** мискәгә ҡоршау кейҙереү; **насади́ть червяка́ на крючо́к** ҡармаҡҡа селәүсен ҡатыу

**НАСА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **насади́ть** II 1; **наса́дка лопа́ты на черено́к** көрәк һаплау **2.** (*приманка*) ем, алдатҡыс; **наса́дка на крючо́к** ҡармаҡҡа ҡата торған ем **3.** *тех.* насадка (*приборҙың кейҙерелеп ҡуйыла торған өлөшө*); **водоме́рные наса́дки** һыу үлсәгес насадкалар

**НАСАЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*посадить много растений*) ултыртыу, күпләп ултыртыу; **насажа́ть дере́вьев** күпләп ағас ултыртыу **2.** *кого-чего* индереп тултырыу, тығыҙлап тултырыу (тейәү), тултырып ултыртыу, урынлаштырыу; **насажа́ть люде́й в авто́бус** халыҡты автобусҡа тултырып ултыртыу

**НАСАЖДА́ТЬ** *несов. что*; *книжн.* индереү, таратыу, үҙләштереү; **насажда́ть но́вую те́хнику** яңы техника индереү

**НАСАЖДА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **насажда́ть**

**НАСАЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **насади́ть** I; **насажде́ние полезащи́тных лесны́х поло́с** баҫыу ышыҡлаусы урман һыҙаттары ултыртыу **2.** *обычно мн.* **насажде́ния** ултыртылған ағастар

**НАСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **насади́ть** I, **насажа́ть** 1

**НАСА́ЖИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **наса́живать**

**НАСА́ЖИВАТЬСЯ II** *несов.*; *разг.* **насе́сть** 1

**НАСА́ЛИВАТЬ I** *несов. см.* **наса́лить**

**НАСА́ЛИВАТЬ II** *несов. см.* **насоли́ть**

**НАСА́ЛИВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **наса́ливать** I

**НАСА́ЛИВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **наса́ливать** II

**НАСА́ЛИТЬ** *сов.*; *разг.* (туң) май һөртөү, майлау; **наса́лить сковороду́** табаны майлау

**НАСА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **насоса́ть**

**НАСА́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **насоса́ться** **2.** *страд. от* **наса́сывать**

**НАСА́ХАРИВАТЬ** *несов. см.* **наса́харить**

**НАСА́ХАРИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наса́харивать**

**НАСА́ХАРИТЬ** *сов. что*; *разг.* шәкәрләү, шәкәр һибеү (һалыу); **наса́харить те́сто** ҡамырға шәкәр һалыу

**НАСВЕ́РЛИВАТЬ** *несов. см.* **насверли́ть**

**НАСВЕ́РЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **насве́рливать**

**НАСВЕРЛИ́ТЬ** *сов. что* быраулау, быраулап (ҡуйыу) сығыу; **насверли́ть отве́рстий** быраулап тишек(тәр) тишеп сығыу

**НАСВИСТА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **насвисте́ть**

**НАСВИСТЕ́ТЬ** *сов. что* (*исполнить свистом*) көйләп һыҙғырыу, һыҙғырып көйләү; **насвисте́ть мело́дию пе́сни** йырҙы һыҙғырып көйләү

**НАСВИ́СТЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **насвиста́ть, насвисте́ть** **2.** әкрен генә һыҙғырыу; **идти́ насви́стывая** әкрен генә һыҙғырып барыу **3.** (*о птицах*) һыҙғырыу, һайрау, һайрашыу; **в лесу́ насви́стывали пти́цы** урманда ҡоштар һайраша ине **4.** (*о ветре, вьюге и т.п.*) һыҙғырыу; **насви́стывает выю́га** буран һыҙғыра

**НАСЕВА́ТЬ** *несов. см.* **насе́ять**

**НАСЕДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **насе́сть** 2—4; **2.** *разг.* (*теснить, наступая*) ҡыҫырыҡлау, ҡыҫыу; **наседа́ть на врага́** дошманды ҡыҫырыҡлау

**НАСЕ́ДКА** *ж* йомортҡа баҫып ултырған тауыҡ

**НАСЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **насе́ять**

**НАСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **насе́чь** 1, 2

**НАСЕКОМОЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *зоол., бот.* бөжәк ашай торған, бөжәк ашаусы; **насекомоя́дная пти́ца** бөжәк ашаусы ҡош **2.** *в знач. сущ.* **насекомоя́дные** *мн.*; *зоол.* бөжәк ашаусылар (*терпе, һуҡыр сысҡан һ.б.*)

**НАСЕКО́МЫЕ** *мн.* (*ед.* **насеко́мое** *с*); *зоол.* бөжәктәр (*себен, бал ҡорто, ҡандала һ.б.*)

**НАСЕЛЕ́НИЕ** *с* халыҡ; **коренно́е населе́ние** ерле (төп) халыҡ

**НАСЕЛЁННОСТЬ** *ж* халыҡтың тығыҙлығы (*һан яғынан күплеге*)

**НАСЕЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **насели́ть** **2.** *прил.* күп халыҡлы, халыҡ тығыҙ ултырған; **населённый край** күп халыҡлы төбәк ♦ **населённый пункт** халыҡ йәшәгән урын, торама пункт (*ҡала, ауыл һ.б.*)

**НАСЕЛИ́ТЬ** *сов.* халыҡты килтереп ултыртыу (урынлаштырыу, индереү, күсендереү); **насели́ть но́вый дом жильца́ми** яңы йортҡа йәшәүселәрҙе күсендереү

**НАСЕЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **насели́ть** **2.** (*составлять население*) йәшәү, тороу; **респу́блику населя́ют ра́зные наро́ды** республикала төрлө халыҡ йәшәй

**НАСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **насели́ться** **2.** *страд. от* **населя́ть** 1

**НАСЕ́СТ** *м* төнәк, төнәү, төнәгес, ҡунал-ҡа; **ку́ры се́ли на насе́ст** тауыҡтар төнәккә менде

**НАСЕ́СТЬ** *сов.* **1.** (*күмәк*) ултырыу; **на теле́гу насе́ло мно́го люде́й** арбаға күмәк кеше ултырған **2.** (*осесть*) ултырыу, ҡуныу; **пыль насе́ла ему́ на лицо́** уның йөҙөнә туҙан ҡунған **3.** *на кого*; *разг.* (*навалиться*) баҫыу, ятыу, ултырыу, ташланыу **4.** *на кого*; *перен.* (*с требованиями*) баҫым яһау, ҡыҫыу, ҡыҫымға алыу

**НАСЕ́ЧКА** *ж* **1.** *см.* **насе́чь**; **насе́чка напи́льника** игәү тешәү **2.** (*нарезка*) һыр, теш, киртек; **насе́чка на жернова́х** тирмән ташы(ның) теше **3.** (*украшение*) биҙәк, һыр; **седло́ с серебря́ными насе́чками** көмөш һырлы эйәр

**НАСЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что, чего* киртеү, киртеп сығыу, соҡоу; **насе́чь ме́тки на ка́мне** ташты киртеп, билдәләр һалып сығыу **2.** тешәү, һырлау; **насе́чь серп** ураҡ тешәү **3.** *что*; *разг.* (*мелко нарубить*) турау, тапау, турап (тапап) ҡуйыу

**НАСЕ́ЯТЬ** *сов. что, чего* **1.** (күпмелер) сәсеү; **насе́ять ржи** күпмелер арыш сәсеү **2.** (*просеять*) (күпмелер) иләү, иләп ҡуйыу; **насе́ять мешо́к муки́** бер тоҡ он иләп ҡуйыу

**НАСИДЕ́ТЬ** *сов. что* (*о птицах*) (баҫып) ултырыу, (баҫып) сығарыу

**НАСИДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** туйғансы ултырыу, ултырып туйыу; **насиде́ться до́ма** өйҙә ултырып туйыу **2.** *в сочетании с предлогом "без" и сущ. в род. п.* оҙаҡ (ваҡыт) ултырыу; **насиде́ться без де́ла** оҙаҡ (ваҡыт) эшһеҙ ултырыу; **насиде́ться без де́нег** оҙаҡ ваҡыт аҡсаһыҙ ултырыу

**НАСИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое *прич. от* **насиде́ть** ♦ **наси́женное ме́сто (гнездо́)** ултырып өйрәнгән урын, эйәләшкән урын, йылы урын; **наси́женное яйцо́** (тауыҡ) баҫҡан йомортҡа

**НАСИ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **насиде́ть**

**НАСИ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наси́живать**

**НАСИ́ЛИЕ** *с* **1.** (*применение физической силы*) көсләү, көс ҡулланыу **2.** (*притеснение*) йәбер, йәбер-золом; **изба́виться от нищеты́ и наси́лия** хәйерселектән һәм йәберҙән ҡотолоу **3.** (*принуждение*) мәжбүр итеү, ирекһеҙләү; **наси́лие над собо́й** үҙ-үҙеңде ирекһеҙләү

**НАСИ́ЛОВАНИЕ** *с см.* **наси́ловать**

**НАСИ́ЛОВАТЬ** *несов.* **1.** *кого* көсләү, мәсхәрәләү **2.** *кого-что* (*принуждать*) ирекһеҙләү, мәжбүр итеү; **наси́ловать себя́** үҙеңде ирекһеҙләү

**НАСИ́ЛУ** *нареч.*; *разг.* ҡыйынлыҡ менән, көскә, саҡ-саҡ; **наси́лу вы́рваться из пле́на** тотҡондан саҡ ҡотолоу

**НАСИ́ЛЬНИК** *м* көсләүсе, ирекһеҙләүсе, йәберләүсе

**НАСИ́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* көсләү, ирекһеҙләү, йәберләү; **не дава́ть наси́льничать над собо́й** үҙеңде йәберләргә юл ҡуймау

**НАСИ́ЛЬНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое көсләп (ирекһеҙләп) эшләнгән (тағылған)

**НАСИ́ЛЬНО** *нареч.* көсләп, ирекһеҙләп; **наси́льно жени́ть** көсләп өйләндереү ♦ **наси́льно мил не бу́дешь** һөймәгәнгә һөйкәлмә

**НАСИ́ЛЬСТВЕННО** *нареч.* көсләп, ирекһеҙләп, теләктән тыш

**НАСИ́ЛЬСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое көсләп тағылған (эшләнгән), мәжбүри, ирекһеҙ; **наси́льственные ме́ры** мәжбүри саралар ♦ **наси́льственная смерть** үлтерелеү, үҙ үлеме менән үлмәү

**НАСКА́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **наскобли́ть**

**НАСКАЗА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** һөйләп (әйтеп) ташлау; **наказа́ть ма́ссу новосте́й** бик күп яңы хәбәрҙәр һөйләп ташлау **2.** *на кого* ошаҡлау, яла яғыу

**НАСКАКА́ТЬ** *сов.* **1.** *на кого-что* сабып (саптырып) килеп бәрелеү; **наскака́ть на забо́р** сабып килеп ҡоймаға бәрелеү **2.** сабып килеп йыйылыу; **наскака́ть со всех сторо́н** төрлө яҡтан сабып килеп йыйылыу

**НАСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **наскочи́ть** и **наскака́ть** 1

**НАСКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡаяға төшөрөлгән (яһалған, яҙылған); **наска́льные рису́нки** ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәр

**НАСКАНДА́ЛИТЬ** *сов.*; *разг.* ғауға (шаушыу) ҡуптарыу, тауышланыу, тауыш сығарыу (күтәреү); **насканда́лить на собра́нии** йыйылышта ғауға ҡуптарыу

**НАСКВО́ЗЬ** *нареч.* **1.** үтәнән-үтә, үтәләй; **проби́ть до́ску наскво́зь** таҡтаны үтәләй тишеү **2.** *перен.*; *разг.* үтәнән-үтә(гә), баштан-аяҡ, тулыһынса, бөтөнләй; **наскво́зь лжи́вое обеща́ние** бөтөнләй ялған вәғәҙә ♦ **ви́деть (знать) наскво́зь** *кого-что* үтәнән-үтә күреү, бик яҡшы белеү

**НАСКОБЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡырыу, ҡырып (әҙерләп) ҡуйыу; **наскобли́ть таре́лку морко́ви** бер тәрилкә кишер ҡырып ҡуйыу **2.** *что*; *разг.* ҡырып таҙартыу (йыуыу); **наскобли́ть пол** иҙәнде ҡырып йыуыу

**НАСКО́К** *м*; *разг.* **1.** *см.* **наскочи́ть** 2—4; **2.** (*налёт*) ырғыу, һөжүм, һөжүм итеү, өҫтөнә ташланыу; **кавалери́йские наско́ки** кавалерия һөжүмдәре **3.** *перен.* (*грубый выпад против кого-л.*) тупаҫ (рәүештә) бәйләнеү (ташланыу), урынһыҙға бәйләнеү **4.** *в знач. нареч.* **наско́ком, наско́ками** уйлап-нитеп тормайынса, уйламайынса, әҙерлекһеҙ, ҡабалан, ашыҡ-бошоҡ; **рабо́та вела́сь наско́ками** эш әҙерлекһеҙ алып барылды ♦ **с наско́ками (наско́ку)**: 1) (*с разгона*) сабып (йүгереп) барғанда, туҡтамайынса, туҡтамаҫтан, бик етеҙ, бик шәп; 2) уйламайынса, уйлап-нитеп тормайынса, әҙерлекһеҙ

**НАСКО́ЛЬКО** *нареч.* күпмегә, ни тиклем, ни хәтле, ни ҡәҙәре, ни саҡлы, ни дәрәжәлә, -ынса/-енсә; **наско́лько мне изве́стно** миңә билдәле булыуынса

**НА́СКОРО** *нареч.*; *разг.* тиҙ генә, йәһәт кенә, тиҙ-тиҙ генә, ашығыс ҡына, ашыҡ-бошоҡ, ҡабалан; **на́скоро пое́сть** ашыҡ-бошоҡ ҡапҡылап алыу

**НАСКОЧИ́ТЬ** *сов. на кого-что* **1.** (*натолкнуться*) килеп бәрелеү (һуғылыу, төкөү, ҡағылыу); **наскочи́ть на столб** бағанаға килеп төкөү **2.** *перен.* көтмәгәндә осрау, осратыу, тап булыу (*гәҙәттә, күңелһеҙ, теләмәгән нәмәгә*); **наскочи́ть на неприя́тную сце́ну** көтмәгәндә күңелһеҙ бер күренешкә тап булыу **3.** (*напасть*) өҫтөнә ырғыу, ташланыу, (көтмәгәндә) һөжүм итеү **4.** *перен.*, *разг.* бәйләнеү, (*тупаҫ һүҙҙәр менән*) ташланыу; **наскочи́ть с упрёками** үпкә һүҙҙәре менән ташланыу

**НАСЛАЖДЕ́НИЕ** *с* ләззәт, хозурлыҡ, рәхәтлек, хозур, рәхәт; **с наслажде́нием слу́шать мело́дию** ләззәт менән көй тыңлау

**НАСЛА́ИВАТЬ** *несов. см.* **наслои́ть**

**НАСЛА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наслои́ться** **2.** *страд. от* **насла́ивать**

**НАСЛАСТИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* татлау, шәрбәтләү; **насласти́ть чай** сәйҙе шәрбәтләү

**НАСЛА́ТЬ** *сов.* **1.** *что*, *кого-чего* (күп итеп) ебәреү; **насла́ть пода́рков** күп итеп бүләктәр ебәреү **2.** сихырлау; **насла́ть боле́знь** сихырлап ауырытыу

**НАСЛЕ́ДИЕ** *с* мираҫ; **тво́рческое насле́дие писа́теля** яҙыусының ижади мираҫы

**НАСЛЕДИ́ТЬ** *сов. чем* и *без доп.*; *разг.* (бысраҡ) эҙ ҡалдырыу, (тапап) бысратыу; **наследи́ть на полу́** иҙәнде бысратыу

**НАСЛЕ́ДНИК** *м* **1.** вариҫ, мираҫ алыусы; **зако́нный насле́дник** законлы вариҫ **2.** *перен.* (*преемник*) дауам итеүсе; **насле́дники революцио́нных тради́ций** революцион традицияларҙы дауам итеүселәр ♦ **насле́дник престо́ла** тәхеткә ултырырға тейешле кеше (вариҫ)

**НАСЛЕ́ДНИЦА** *ж* вариҫ ҡатын-ҡыҙ

**НАСЛЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое мираҫ алыусы, тәхеткә ултырырға тейешле; **насле́дный князь** тәхеткә ултырырға тейешле кенәз

**НАСЛЕ́ДОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **насле́довать** **2.** *юр.* вариҫлыҡ; **претендова́ть на пра́во насле́дования** вариҫлыҡ хоҡуғына дәғүә итеү

**НАСЛЕ́ДОВАТЬ** *сов.*, *несов. что* **1.** мираҫ итеп алыу; **насле́довать име́ние от отца́** атай донъяһын мираҫ итеп алыу **2.** нәҫелдән (тоҡомдан, заттан) килеү (алыу, булыу); **черты́ хара́ктера он насле́довал от отца́** холоҡ үҙенсәлектәрен ул атаһынан алған **3.** *кому* вариҫ булыу

**НАСЛЕ́ДОВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **насле́довать** 1, 2

**НАСЛЕДОДА́ТЕЛЬ** *м*; *юр.* мираҫ (итеп) биреүсе (тапшырыусы)

**НАСЛЕ́ДСТВЕННОСТЬ** *ж* нәҫел(лек), тоҡом (зат) һаҡлау, нәҫелдән нәҫелгә күсеү,

нәҫелдән бирелеү; **нарушáть наслéдственность** нәҫелде боҙоу

**НАСЛÉДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** мираҫ ...ы, мираҫҡа ҡалған, мираҫ итеп ҡалдырылған; **наслéдственное прáво** мираҫҡа эйә булыу хоҡуғы **2.** нәҫелдән (тоҡомдан, заттан) килгән (булған, ҡалған, күскән), зат ҡыуған, ата-бабанан ҡалған; **болéзнь у негó наслéдственная** уның ауырыуы нәҫелдән килә

**НАСЛÉДСТВО** *с* **1.** *прям.*, *перен.* мираҫ; **закóнное наслéдство** законлы (тейешле, хаҡлы) мираҫ; **наýчное наслéдство** фәнни мираҫ **2.** *юр.* мираҫ, мираҫҡа эйә булыу; **правá наслéдства** мираҫ хоҡуғы

**НАСЛОÉНИЕ** *с* **1.** *см.* **наслои́ть, наслои́ться**; **наслоéние грýнта** тупраҡтың ҡатлауланып ултырыуы **2.** *геол.* ҡатлау; **песчáное наслоéние** ҡом ҡатлауы **3.** *перен.* (*особенность, черта*) үҙенсәлек, үҙсәнлек, сифат (*мәҙәниәттә, холоҡта, аңда һ.б.*)

**НАСЛОИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** (*наложить слоями*) ҡатлаулап һалыу, ҡатлы-ҡатлы итеп һалыу; **наслои́ть си́лос в я́му** силосты соҡорға ҡатлаулап һалыу **2.** (*разделить на слои*) ҡатҡа айырыу, ҡатҡа бүлеү (*бер нисә*), ҡатҡа бүлгеләү, ҡатлауҙарға айырыу (бүлеү); **наслои́ть слюды́** слюданы ҡатлауҙарға айырыу

**НАСЛОИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡатлауланыу, ҡатлауланып ултырыу

**НАСЛÝШАТЬСЯ** *сов.* **1.** күп ишетеү; **наслýшаться вся́ких новостéй** төрлө яңылыҡтар ишетеү **2.** (*вдоволь послушать*) туйғансы (танһыҡ ҡанғансы) тыңлау; **наслýшаться мýзыки** туйғансы музыка тыңлау

**НАСЛЫ́ШАННЫЙ,** -ая, -ое (*обычно кратк. ф.*) *разг.* ишетеп (ишетеү буйынса) яҡшы белгән; **я о вас немáло наслы́шан** мин һеҙҙе ишетеү буйынса яҡшы беләм

**НАСЛЫ́ШАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ишетеп күпте белеү, күпте ишетеү; **я мнóго наслы́шался о вас** мин һеҙҙең турала бик күп ишеттем

**НАСЛЮ́НИВАТЬ** *несов. см.* **наслюни́ть**

**НАСЛЮ́НИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **наслю́нивать**

**НАСЛЮНИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* төкөрөкләү; **наслюни́ть почтóвую мáрку** почта маркаһын төкөрөкләү

**НАСМÁРКУ: идти́ (пойти́) насмáрку** юҡҡа (бушҡа) сығыу, елгә осоу, барып сыҡмау, юғалыу

**НÁСМЕРТЬ** *нареч.* **1.** үлемесле; **рáнить нáсмерть** үлемесле яралау **2.** *перен.* йәнде аямай (ҡыҙғанмай); **стоя́ть (би́ться, сражáться и т.п.) нáсмерть** йәнде аямай ҡаршы тороу (алышыу) **3.** *перен.*, *прост.* бик ныҡ, үлемесле булып, үлә яҙып; **перепугáться нáсмерть** үлә яҙып ҡурҡыу

**НАСМЕХÁТЬСЯ** *несов. над кем-чем* көлөү, мыҫҡыл итеү, мыҫҡыллау

**НАСМЕШИ́ТЬ** *сов. кого* көлдөрөү; **насмеши́ть ребя́т** балаларҙы көлдөрөү

**НАСМÉШКА** *ж* мыҫҡыл, мыҫҡыллы көлөү; **подвергáться насмéшкам** мыҫҡыл ителеү

**НАСМÉШЛИВО** *нареч.* мыҫҡыл итеп көлөп, мыҫҡыллап (көлөп), көлкөгә ҡалдырып; **сказáть насмéшливо** мыҫҡыллап әйтеү

**НАСМÉШЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** мыҫҡыл итеүсән, көлөргә (мыҫҡыл итергә) яратыусан, көлөүсән; **насмéшливый человéк** мыҫҡыл итергә яратыусан кеше **2.** мыҫҡыллы; **насмéшливая улы́бка** мыҫҡыллы йылмайыу

**НАСМÉШНИК** *м* мыҫҡыл итеүсән (мыҫҡылларға яратыусан) кеше, кешенән көлөргә яратыусан кеше

**НАСМÉШНИЧАТЬ** *несов. над кем-чем* и *без доп.*; *разг.* көлөп (мыҫҡыллап) һөйләү, мыҫҡыллау; **он лю́бит насмéшничать** ул мыҫҡыллап һөйләргә ярата

**НАСМЕЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*вдоволь посмеяться*) туйғансы көлөү; **насмея́ться от души́** ысын күңелдән туйғансы көлөү **2.** *над кем-чем* (*обидеть*) мыҫҡыл итеп көлөү, мыҫҡыл итеү

**НÁСМОРК** *м* тымау; **мýчиться нáсморком** тымауҙан интегеү

**НАСМОТРÉТЬСЯ** *сов.* **1.** *на кого-что* күреп (ҡарап) туйыу, туйғансы ҡарау; **вдóволь насмотрéться на красóты прирóды** тәбиғәттең гүзәллегенә туйғансы ҡарау **2.** *кого-чего* (*увидеть много чего-л.*) күп ҡарау (күреү); **насмотрéться рáзных чудéс** бик күп төрлө мөғжизәләр күреү

**НАСОБИРÁТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* йыйыу, йыйып алыу; **насобирáть корзи́ну я́год** бер кәрзин еләк йыйып алыу

**НАСОВÁТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* тығыу, тултырыу; **насовáть конфéт в кармáны** кеҫәләргә кәнфит тултырыу

**НАСОВÉТОВАТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* кәңәш биреү; **насовéтовать ли́шнего** кәрәкмәгән кәңәштәр биреү

**НАСОВСÉМ** *нареч.*; *прост.* бөтөнләйгә, мәңгегә; **уéхать насовсéм** бөтөнләйгә китеү

**НАСÓВЫВАТЬ** *несов. см.* **насовáть**

**НАСОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тоҙлау, тоҙлап ҡуйыу; **насоли́ть огурцóв** ҡыяр тоҙлап ҡуйыу **2.** *разг.* (*пересолить*) артыҡ тоҙ һалыу, ныҡ тоҙлау; **насоли́ть суп** ашты ныҡ тоҙлау **3.** *кому* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* насарлыҡ эшләү, яраға тоҙ һалыу

**НАСОРИ́ТЬ** *сов.* ҡыйлап бөтөү (ташлау); **насори́ть в кóмнате** бүлмәне ҡыйлап бөтөү

**НАСÓС** *м* насос; **качáть вóду насóсом** насос менән һыу һурҙырыу

**НАСОСÁТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* имеү; **насосáть из буты́лки молокá** шешәнән һөт имеү **2.** һурҙырып тултырыу, һурҙырыу; **насосáть бóчку кероси́на** бер мискә кәрәсин һурҙырыу

**НАСОСА́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы имеү, имеп туйыу; **ребёнок насоса́лся молока́** бала һөт имеп туйған

**НАСО́СНЫЙ,** -ая, -ое насос ...ы; **насо́сный по́ршень** насос бешкәге

**НАСО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** (йәбешеп) кибеү, ҡатыу, кибеп ҡатыу; **на коре́ де́рева насо́хла смола́** ағас ҡабығында ыҫмала кибеп ҡатҡан **2.** ҡороу, ҡороп бөтөү; **в лесу́ насо́хло мно́го берёз** урманда күп кенә ҡайын ҡороған

**НАСОЧИНЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** (*сочинить в большом количестве*) күп яҙыу; **насочиня́ть мно́го стихо́в** шиғырҙарҙы күп яҙыу **2.** (*выдумать*) юҡ-барҙы (булмағанды) уйлап сығарыу, үҙенән сығарып һөйләү; **насочиня́ть чепухи́** юҡ-барҙы уйлап сығарыу

**НАСОЧИ́ТЬСЯ** *сов.* тамып (һарҡып) йыйылыу, үтеп инеү

**НА́СПЕХ** *нареч.* ашығыс, ашыҡ-бошоҡ, арлы-бирле, ҡабалан; **де́лать уро́ки на́спех** дәресте ашыҡ-бошоҡ әҙерләү

**НАСПИРТОВА́ТЬ** *сов. что* спиртлау, спирт һеңдереү; **наспиртова́ть препара́ты** препараттарҙы спиртлау

**НАСПИРТОВА́ТЬСЯ** *сов.* спиртланыу, спирт һеңеү

**НАСПИРТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **наспиртова́ть**

**НАСПИРТО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наспиртова́ться 2.** *страд. от* **наспирто́вывать**

**НАСПЛЕ́ТНИЧАТЬ** *сов.*; *разг.* ғәйбәт һатыу (һөйләү)

**НАСТ** *м* ҡаты ҡар, ҡар шекәрәһе (*епшек көндән һуң ҡар өҫтөнә ҡатҡан йоҡа боҙ*)

**НАСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **наста́ть**

**НАСТАВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое өгөтләү ...ы, нәсихәт ...ы, вәғәзләү ...ы; **настави́тельный тон** нәсихәт тоны

**НАСТА́ВИТЬ I** *сов.* **1.** *что, кого-чего* ҡуйыу, ҡуйып сығыу, теҙеп (ултыртып) сығыу; **наста́вить в те́ксте запяты́х** текста өтөрҙәр ҡуйып сығыу **2.** *что* (*удлинить*) ялғау, ялғап оҙонайтыу; **наста́вить пла́тье** күлдәкте ялғап оҙонайтыу; **наста́вить кусо́к тка́ни к рукаву́** туҡыма киҫәген еңгә ялғау **3.** *что* (*нацелить*) төбәү, йүнәлтеү, төҙәү, тоҫҡау; **наста́вить ружьё** мылтыҡ төҙәү ♦ **наста́вить нос** *кому* алдау, көлкөгә ҡалдырыу, төп башына ултыртыу; **наста́вить рога́** *кому*: 1) мөгөҙ ҡуйыу (*иргә хыянат итеү*); 2) (*берәй кеше бисәһенең һөйәре булыу*); **наста́вить у́хо (у́ши)** ҡолаҡ һалыу, иғтибар итеү

**НАСТА́ВИТЬ II** *сов. кого*; *уст.* өгөтләү, өгөт-нәсихәт биреү, өйрәтеү, вәғәзләү; **наста́вить на ум** аҡыл өйрәтеү, яҡшылыҡҡа өйрәтеү; **наста́вить на путь и́стины (на и́стинный путь)** *см.* **путь**

**НАСТА́ВКА** *ж* **1.** *см.* **наста́вить** I 2; **наста́вка рукаво́в** еңдәрҙе ялғап оҙонайтыу **2.** (*надставка*) ялғау(лыҡ); **рукава́ с наста́вкой** ялғаулы (ялғау ҡуйылған) еңдәр

**НАСТАВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **наста́вить** II; **поддава́ться наставле́нию** өгөтләүгә (ыҡҡа) килеү **2.** (*указание, совет*) кәңәш, күрһәтмә; **отцо́вское наставле́ние** атай(ҙың) кәңәше **3.** (*инструкция*) ҡулланма; **соста́вить наставле́ние по пла́ванию** йөҙөргә өйрәнеү буйынса ҡулланма төҙөү

**НАЧЕСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего*; *в разн. знач.* тарау, тарап төшөрөү (алыу), тәрәшләү; **начеса́ть льна** етен тәрәшләү; **начеса́ть ко́зьего пу́ха** дебет тарап алыу; **начеса́ть во́лосы на лоб** сәсте маңлайға тарап төшөрөү **2.** *что*; *разг.* тырнап йәрәхәтләү; **начеса́ть до́ крови щёку** яңаҡты тырнап ҡанатыу

**НАЧЕ́СТЬ** *сов.*; *бухг.* раҫланмаған сығымды кире ҡайтарып алыу (тотоп алып ҡалыу), өҫтөнә сығарыу; **наче́сть с жа́лованья** эш хаҡынан тотоп алып ҡалыу

**НАЧЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **начеса́ть**

**НАЧЁСЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **начёсывать**

**НАЧЁТ** *м*; *бухг.* начёт (*раҫланмаған сығымды ҡаплау өсөн кире ҡайтарып бирелергә тейешле аҡса*)

**НАЧЁТНИЧЕСТВО** *с* хәреф ятлау (*уҡығанды аңламайынса ятлап алынған белем*)

**НАЧЁТЧИК** *м* хәреф ятлаусы

**НАЧИНА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **начина́ть 2.** башланғыс, инициатива; **поддержа́ть начина́ния молодо́го учи́теля** йәш уҡытыусының башланғыстарын хуплау

**НАЧИНА́ТЕЛЬ** *м* башлаусы, башлап ебәреүсе, нигеҙ һалыусы, инициатор; **начина́тель поле́зных дел** файҙалы эштәрҙе башлап ебәреүсе

**НАЧИНА́ТЬ** *несов. см.* **нача́ть**

**НАЧИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **нача́ться** **2.** *страд. от* **начина́ть**

**НАЧИНА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **начина́ть** **2.** *прил.* яңы башлаусы, яңы башлап тотоноусы, йәш, тәжрибәһеҙ; **начина́ющий писа́тель** йәш яҙыусы **3.** *в знач. сущ.* **начина́ющий** *м* и **начина́ющая** *ж* башлап тотоноусы, өйрәнә башлаусы; **уче́бник для начина́ющих** өйрәнә башлаусылар өсөн дәреслек

**НАЧИНА́Я** **1.** *деепр. от* **начина́ть** **2.** *предлог с род. п.* (*в сочетании с предлогами "с" и "от"*) башлап; **начина́я с пе́рвого сентября́** беренсе сентябрҙән башлап

**НАЧИ́НИВАТЬ** *несов. см.* **начини́ть** II

**НАЧИНИ́ТЬ I** *сов. что, чем* (эсенә) тултырыу (һалыу), тултырып яһау; **начини́ть пироги́ гриба́ми** бәлешкә бәшмәк һалыу

**НАЧИНИ́ТЬ II** *сов. что, чего; разг.* **1.** (*починить*) ямаштырыу, ямап ҡуйыу; **начини́ть мно́го носко́в** ойоҡбаштар ямап ҡуйыу **2.** (*очинить*) ослау, ослап ҡуйыу (ташлау); **начини́ть карандаше́й** ҡәләмдәр ослап ҡуйыу

**НАЧИ́НКА** *ж* **1.** *см.* **начини́ть** I — **начиня́ть** **2.** эс, -лы/-ле; **начи́нка пирога́** бәлеш эсе; **пиро́г с мясно́й начи́нкой** итле бәлеш

**НАЧИ́НОЧНЫЙ,** -ая, -ое эсенә һалына торған; **начи́ночное мя́со** бәлеш эсенә һалына торған ит

**НАЧИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **начини́ть** I

**НАЧИ́РКАТЬ** *сов. что, чего; разг.* (*спичек*) һыҙып бөтөрөү, һыҙғылау; **начи́ркать полкоро́бки спи́чек** ярты ҡап шырпы(ны) һыҙып бөтөрөү

**НАЧИСЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **начи́слить** — **начисля́ть** **2.** *бухг.* (*сумма*) өҫтәп иҫәпләнгән сумма, өҫтәлгән сумма; **начисле́ния на за́работную пла́ту** эш хаҡына өҫтәлгән сумма

**НАЧИ́СЛИТЬ** *сов. что; бухг.* иҫәпләп өҫтәү (сығарыу, яҙыу); **начи́слить проце́нты** иҫәпләп процент өҫтәү; **начи́слить за́работную пла́ту** эш хаҡын иҫәпләп яҙып ҡуйыу

**НАЧИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **начи́слить**

**НАЧИСЛЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от.* **начисля́ть**

**НАЧИ́СТИТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* әрсеү, таҙалау, ҡырыу, әрсеп (таҙартып, ҡырып) ҡуйыу; **начи́стить карто́шки** картуф әрсеп ҡуйыу **2.** *что; разг.* (*вычистить*) таҙартыу; **начи́стить сапоги́** итекте таҙартыу

**НА́ЧИСТО** *нареч.* **1.** *разг.* таҙа, тап-таҙа, аҡ, аҡҡа; **на́чисто вы́белить избу́** өйҙө аҡҡа буяп сығыу; **перепи́сывать на́чисто** таҙаға күсереп яҙыу **2.** (*решительно*) бөтөнләй(гә), ҡәтғи рәүештә; **на́чисто отказа́ться плати́ть** түләүҙән ҡәтғи рәүештә баш тартыу

**НАЧИСТОТУ́** *нареч.; разг.* ысын күңелдән, йәшермәй(енсә), асыҡтан-асыҡ, туранан-тура; **поговори́ть начистоту́** асыҡтан-асыҡ һөйләшеү

**НАЧИСТУ́Ю** *нареч.; разг.* **1.** *см.* **на́чисто** **2.** *см.* **начистоту́**

**НАЧИ́ТАННОСТЬ** *ж* уҡымышлы (белемле) булыу

**НАЧИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое күп уҡыған, уҡымышлы, белемле; **начи́танный челове́к** күп уҡыған кеше

**НАЧИТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что; разг.* уҡыу, уҡып сығыу; **начита́ть за́ год мно́го книг** бер йылда бик күп китап уҡып сығыу **2.** *что; тех.* (*прочитать для звукозаписи*) яҙҙырыу өсөн уҡыу

**НАЧИТА́ТЬСЯ** *сов.* күп уҡыу, уҡып туйыу; **начита́ться рома́нов** бик күп романдар уҡыу; **не могу́ начита́ться** уҡып туя алмайым

**НАЧИ́ТЫВАТЬ I** *несов. см.* **наче́сть**

**НАЧИ́ТЫВАТЬ II** *несов. см.* **начита́ть**

**НАЧИ́ТЫВАТЬСЯ I** *несов. страд. от* **начи́тывать** I

**НАЧИ́ТЫВАТЬСЯ II** *несов. страд. от* **начи́тывать** II

**НАЧИХА́ТЬ** *сов.; разг.* **1.** сөскөрөп сәсрәтеү (бысратыу) **2.** *только неопр. кому в знач. сказ.; прост.* иғтибар итмәү, барыбер тип һанау

**НАЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **начи́стить**

**НАЧИЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **начи́ститься** **2.** *страд. от* **начища́ть**

**НАЧУДИ́ТЬ** *сов.; разг.* әкәмәтләнеү, йүләрлек эшләп ташлау, йүләрләнеү

**НАШ** *м* (наша *ж*, наше *с*) *мест.* **1.** беҙҙең; **на́ши жела́ния** беҙҙең теләктәр(ебеҙ); **на́ши роди́тели** беҙҙең ата-әсәләр **2.** *в знач. сущ.* **на́ше** *с; разг.* үҙебеҙҙеке, беҙҙеке; **на́ше никуда́ не уйдёт** беҙҙеке бер ҡайҙа ла китмәҫ (юғалмаҫ) **3.** *в знач. сущ.* **на́ши** *мн.; разг.* беҙҙекеләр; **на́ши прие́хали** беҙҙекеләр килгән (ҡайтҡан) **4.** *в знач. сущ.* **наш** *м* и **на́ша** *ж; прост.* башлыҡ (*хужа, етәксе һ.б.*); **наш не лю́бит опа́здывающих** беҙҙең хужа һуңлап килеүселәрҙе яратмай ♦ **наш брат** беҙҙең ағай-эне, беҙҙең кеше (халыҡ); **на́ша берёт (возьмёт, взяла́)** өҫтөнлөктө беҙ алабыҙ (алдыҡ), беҙ еңәбеҙ (еңдек), беҙҙеке еңә (еңде); **на́ше вам!** *прост., шутл.* сәләм бирҙек! (*иҫәнләшеү мәғәнәһендә*); **и на́шим и ва́шим** ике яҡҡа ла ярарға тырышыу; **по-на́шему** беҙҙеңсә

**НА́ША** *ж мест. см.* **наш**

**НАШАЛИ́ТЬ** *сов.* шаярыу, шаянлыҡтар (шуҡлыҡтар) эшләп ташлау, шаярып ташлау

**НАШАЛИ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* туйғансы шаярыу, шаярып туйыу; **де́ти за́ день нашали́лись** балалар көн(ө) буйы шаярып туйҙылар

**НАША́РИВАТЬ** *несов. см.* **наша́рить**

**НАША́РИТЬ** *сов.; разг.* һәрмәп (һәрмәләп, һәрмәнеп) эҙләп табыу; **наша́рить звоно́к** һәрмәп звонокты эҙләп табыу

**НАШАТЫ́РНЫЙ,** -ая, -ое нишатыр ...ы, нишатырлы; **нашаты́рный спирт** нишатыр спирты

**НАШАТЫ́РЬ** *м* нишатыр (**1.** *химик матдә* **2.** *һөйл. нишатыр спирты*)

**НАШВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **нашвыря́ть**

**НАШВЫРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ырғытыу, ташлау, ташлап туҙҙырыу (тултырыу); **нашвыря́ть камне́й** күп таш ырғытыу

**НА́ШЕ** *с мест. см.* **наш**

**НАШЕЛУШИ́ТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* әрсеү, ҡабығын һыҙырыу, әрсеп (һыҙырып) ҡуйыу, һурҙыртыу; **нашелуши́ть се́мечек** көнбағыш һурҙыртыу

**НАШЕПТА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* бышылдау, шыбырлау, бышылдап (шыбырлап) һөйләү (һөйләп биреү); **нашепта́ть серде́чные та́йны** йөрәк серҙәрен бышылдап ҡына һөйләп биреү **2.** (*наклеветать*) яла яғыу **3.** *устар.* (*внушить тайным образом*) аҫтыртын ҡотортоу **4.** *на что*; *уст.* өшкөрөү

**НАШЕПТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бышылдашыу (шыбырлашыу); **вдо́воль нашепта́ться с дру́гом** дуҫ менән туйғансы бышылдашыу

**НАШЁПТЫВАТЬ** *несов. см.* **нашепта́ть**

**НАШЁПТЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нашёптывать**

**НАШЕ́СТВИЕ** *с* баҫып инеү, ябырылыу, яу булып килеү, һөжүм; **наше́ствие завоева́телей** баҫҡынсыларҙың ябырылыуы

**НА́ШИ** *мн. мест. см.* **наш**

**НАШИВА́НИЕ** *с см.* **нашива́ть**

**НА́ШИВАТЬ** *несов.*; *разг. от* **носи́ть**

**НАШИВА́ТЬ** *несов. см.* **наши́ть**

**НАШИВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **нашива́ть**

**НАШИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **наши́ть 2.** (*то, что нашито*) һыҙат (*әйбер өҫтөнән биҙәк өсөн тегеп ҡуйылған тар туҡыма, күн һ.б.*) **3.** *воен.* билдә, билге (*хәрби звание билдәһе*); **наши́вки на рукаве́** еңдәге билдәләр; **наши́вки ране́ний** яраларҙы белдергән билгеләр

**НАШИВНО́Й,** -ая, -ое өҫтән тегелгән, өҫтән тегеп ҡуйылған, тышҡы; **нашивно́й карма́н** тышҡы кеҫә

**НАШИНКОВА́ТЬ** *сов. что* турау, турап ҡуйыу (алыу, ташлау); **нашинкова́ть капу́сту** кәбеҫтә турау

**НАШИНКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **нашинкова́ть**

**НАШИНКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нашинко́вывать**

**НАШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*пришить*) тегеп ҡуйыу; **наши́ть карма́н** кеҫә тегеп ҡуйыу **2.** *что* (күп итеп) тегеү, тегеп ҡуйыу, тегеп әҙерләп ҡуйыу; **наши́ть пла́тьев** күп итеп күлдәктәр тегеп ҡуйыу

**НАШЛЁПАТЬ** *сов. кого*; *разг.* сапылдата һуғыу, сәпәләп алыу, сикәләү; **нашлёпать по щека́м** сикәләү

**НАШПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **нашпи́лить**

**НАШПИ́ЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нашпи́ливать**

**НАШПИ́ЛИТЬ** *сов. кого-что* ҡаҙап (элеп, беркетеп) ҡуйыу; **нашпи́лить ле́нту на шля́пу** эшләпәгә таҫма ҡаҙап ҡуйыу

**НАШТАМПОВА́ТЬ** *сов. что* штамп һуғыу, штампылап ҡуйыу; **наштампова́ть дета́ли** деталдәр штампылап ҡуйыу

**НАШТАМПО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **наштампова́ть**

**НАШУМЕ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **нашуме́ть 2.** *прил.* (*привлёкший внимание*) донъя шаулатҡан; **нашуме́вший рома́н** донъя шаулатҡан роман

**НАШУМЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*произвести шум*) тауышланыу, шаулау, тауыш сығарыу (ҡуптарыу), шау ҡуптарыу **2.** *перен.* (*вызвать много разговоров*) шаулатыу; **нашуме́ть по всему́ го́роду** бөтә ҡаланы шаулатыу

**НАЩЁЛКАТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* ярыу, ватыу, ярып (ватып) ташлау; **нащёлкать оре́хов** сәтләүек ярыу; **нащёлкать се́мечек** көнбағыш ярыу

**НАЩЁЛКИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **нащёлкать 2.** *чем*; *разг.* шартлатыу; **нащёлкивать кнуто́м** сыбыртҡы шартлатыу **3.** (*о птицах*) һайрау; **солове́й нащёлкивает** һандуғас һайрай

**НАЩИПА́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* йолҡоу, йолҡоп йыйыу; **нащипа́ть травы́** үлән йолҡоп йыйыу **2.** *разг.* семтеү, семтеп ауырттырыу; **нащипа́ть щёки** битте семтеп ауырттырыу

**НАЩИ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **нащипа́ть**

**НАЩИ́ПЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нащи́пывать**

**НАЩУ́ПАТЬ** *сов. что* **1.** һәрмәп (ҡапшап) табыу; **нащу́пать пульс** пульсты ҡапшап табыу **2.** *перен.* табыу, эҙләп табыу; **нащу́пать но́вые исто́чники не́фти** яңы нефть сығанаҡтарын эҙләп табыу ♦ **нащу́пать по́чву** алдан юл (нигеҙ) табыу

**НАЩУ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **нащу́пать**

**НАЩУ́ПЫВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **нащу́пывать**

**НАЭЛЕКТРИЗОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*зарядить электричеством*) электрлау, электрландырыу **2.** *кого-что*; *перен.* тәьҫирләндереү, тәьҫир итеү, дәртләндереү; **наэлектризова́ть зри́телей** тамашасыларҙы тәьҫирләндереү

**НАЭЛЕКТРИЗОВА́ТЬСЯ** *сов.* электрланыу

**НАЭЛЕКТРИЗО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **наэлектризова́ть**

**НАЭЛЕКТРИЗО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **наэлектризова́ться 2.** *страд. от* **наэлектризо́вывать**

**НАЯ́БЕДНИЧАТЬ** *сов. на кого-что* и *без. доп.*; *разг.* ошаҡлау, яла яғыу

**НАЯВУ́** *нареч.* өндә; **ви́деть сон как наяву́** өндәге кеүек төш күреү

**НАЯ́ДА** *ж* наяда (*грек мифологияһында йылғалар һәм шишмәләр аллаһы*)

**НЕ I** *частица* **1.** (*для выражения полного отрицания*) -ма/-мә, -май/-мәй, -маç/-мәç; **не пи́шет** яҙмай; **не зна́ет** белмәй; **не поймёт** аңламаç; **не придёт** килмәç; **тебе́ его́ не одоле́ть** һин уны еңә алмаçһың

**2.** (*для придания неопределённости, неполного отрицания*) түгел, -ма/-мә; **пиджа́к не пиджа́к** пинжәк тиһәң пинжәк түгел; **сон не сон** йоҡо йоҡо түгел; **говори́ не говори́** әйттең ни, әйтмәнең ни

**3.** (*при противопоставлении*) түгел; **не река́, а гора́** йылға түгел, ә тау

**4.** (*для придания или усиления утвердительного значения*) -ма/-мә түгел, -ма/-мә; **невозмо́жно не сказа́ть** әйтмәй мөмкин түгел; **нельзя́ не люби́ть** яратмай мөмкин түгел; **как не вспо́мнишь об э́том!** нисек был турала иçкә төшөрмәйһең!

**5.** (*для выражения предположительности*) түгел, -ма/-мә; **не сон ли это?** төш түгелме был?; **не ну́жен ли помо́щник?** ярҙамсы кәрәкмәйме?

**6.** (*в сочетании с предлогом "без" придаёт значение ограниченного утверждения*) шаҡтай, -майынса/-мәйенсә түгел; **не без ра́дости** шатланмайынса мөмкин түгел

**7.** (*в сочетании с частицами "чуть", "едва" образует сочетания со значением возможности, допустимости*) саҡ ҡына (аҙ ғына) -мау/-мәү (-май/-мәй) ҡалыу, -а/-ә яҙыу; **я чуть было не упа́л** мин йығыла яҙҙым; **он едва́ не поги́б** ул саҡ һәләк булмай ҡалды

**8.** (*при глаголах на "-ся", имеющих приставку "на", обозначает невозможность, нежелание и т.п. прекратить действие*) -ма/-мә; **мы не могли́ наговори́ться** беҙ һөйләшеп туя алманыҡ ♦ **не насто́лько ..., что́бы** -маçлыҡ/-мәçлек (дәрәжәлә) түгел; **он не насто́лько бо́лен, что́бы не прийти́ на рабо́ту** ул эшкә килмәçлек ауырыу түгел; **не то ..., не то** әллә..., әллә; **не то снег, не то дождь** әллә ҡар, әллә ямғыр; **не то́лько ..., но и** ғына түгел, -да/-дә; **не то́лько де́ти, но и взро́слые** балалар ғына түгел, ололар ҙа; **не что ино́е, как** ғына, башҡа бер ни түгел; **тем не ме́нее** шулай булһа ла, шулай булыуға ҡарамаçтан; **хотя́ (и) не ..., но (одна́ко)** -маһа ла/-мәһә лә; **хотя́ и не соглаша́ется, но понима́ет** риза булмаһа ла аңлай; **не сто́лько ..., ско́лько** -дан/-дән, -ҙан/-ҙән бигерәк; **он не сто́лько умён, ско́лько нахо́дчив** ул аҡыллы булыуҙан бигерәк тапҡыр

**НЕ́ II** (*всегда под ударением*; *в сочетании с предлогами является отделяемой частью местоимений "некого", "нечего"*) юҡ; **не́ с кем поговори́ть** һөйләшер кеше юҡ

**НЕ...** *приставка* (*исем йәки сифат яһалышында ҡулланып, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: **1.** *һүҙҙең белдергән мәғәнәһенә ҡапма-ҡаршы мәғәнәне*, *мәç*., **непра́вда** ялған; **не́друг** дошман; **недо́брый** уçал **2.** "*түгел*", "*-һыҙ/-һеҙ*", "*-һыҙлыҡ/-һеҙлек*" *мәғәнәләрен*, *мәç*., **небольшо́й** ҙур түгел; **невнима́тельный** иғтибарһыҙ; **невино́вность** ғәйепһеҙлек; **нево́ля** ирекһеҙлек)

**НЕАДЕКВА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тиңдәш (бер тиң, бер иш) булмаған, тура (тапҡыр) килмәгән **2.** *проф*. нормаль булмаған, ғәҙәти булмаған; **неадеква́тная реа́кция** ғәҙәти булмаған реакция

**НЕАККУРА́ТНОСТЬ** *ж* йыйнаҡһыҙлыҡ, ыҡсым (бөхтә) булмау, әрпешлек, шапшаҡлыҡ, һәпрәлек, насар башҡарылғанлыҡ; **неаккура́тность ребёнка** баланың йыйнаҡһыҙлығы; **неаккура́тность рабо́ты** эштең насар башҡарылғанлығы (башҡарылышы)

**НЕАККУРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неисполнительный*) тәртипкә буйһонмаусан, тәртипһеҙ, ваҡытында эшләнмәгән; **неаккура́тный пла́тельщик нало́га** һалымды ваҡытында түләмәгән кеше **2.** *разг*. (*небрежно сделанный*) еренә еткерелмәгән, арамъя; **неаккура́тный рису́нок** еренә еткерелмәгән һүрәт **3.** (*неопрятный*) шапшаҡ, һәпрә, әрпеш; **неаккура́тный ма́льчик** шапшаҡ малай

**НЕАКТУА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое актуаль булмаған; **неактуа́льная статья́** актуаль булмаған мәҡәлә

**НЕАППЕТИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәмһеҙ; **неаппети́тная еда́** тәмһеҙ ашамлыҡ **2.** *перен*., *разг*. (*неприятный*) насар, ҡыҙыҡһыҙ; **неаппети́тный вид** насар ҡиәфәт

**НЕБЕЗ...** (**небес...**) *приставка*; *сифаттарҙың мәғәнә көсөн кәметә төшөп*, "*-һыҙ/-һеҙ* (*үҡ/үк*) *булмаған*", "*-һыҙ/-һеҙ* (*үк*) *түгел*", "*бөтөнләй түгел*", "*шаҡтай*", "*ғына/генә*" *мәғәнәләрен аңлата*, *мәç*., **небезвре́дный** зарарһыҙ түгел

**НЕБЕЗГРЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое гөнаһһыҙ түгел (булмаған); **небезгре́шный челове́к** гөнаһһыҙ булмаған кеше

**НЕБЕЗНАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое ышаныcһыҙ уҡ түгел, өмөтлө генә, ышаныслы ғына; **небезнадёжное положе́ние** өмөтлө генә хәл

**НЕБЕЗОБИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ул хәтлем йыуаш түгел, уçал ғына; **небезоби́дный челове́к** уçал ғына кеше **2.** (*обидный*) рәнйетерлек, хәтер ҡалырлыҡ; **небезоби́дное сло́во** рәнйетерлек һүҙ **3.** (*небезвредный*) шаҡтай зарарлы; **небезоби́дное лека́рство** шаҡтай зарарлы дарыу

**НЕБЕЗОПА́СНЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡынıслы, хәүеф-хәтәрле; **небезопа́сная доро́га** ҡурҡыныслы юл

**НЕБЕЗОСНОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое нигеҙле (генә), нигеҙһеҙ үк түгел; **небезоснова́тельные до́воды** нигеҙле генә дәлилдәр

**НЕБЕЗРАЗЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** битараф булмаған, ҡыҙыҡһынып, ҡыҙыҡһыныусан, иғтибарлы, иғтибар менән; **небезразли́чное отно-**

**ше́ние к де́лу** эшкә иғтибарлы ҡараш **2.** *для кого, кому в знач. сказ.* барыбер (битараф) түгел; **он мне небезрази́чен** миңә ул барыбер түгел, миңә ул оҡшай

**НЕБЕЗРЕЗУЛЬТА́ТНЫЙ,** -ая, -ое нәтижәле генә, һөҙөмтәһеҙ үк түгел (булмаған)

**НЕБЕЗУСПЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое уңышлы (ғына), уңышһыҙ уҡ түгел (булмаған); **небезуспе́шные стара́ния** уңышһыҙ уҡ булмаған тырышлыҡтар

**НЕБЕЗУЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое иғтибарлы; **небезуча́стный взгляд** иғтибарлы ҡараш (күҙ ҡарашы)

**НЕБЕЗЫЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое билдәһеҙ түгел (булмаған), билдәле, танылған; **небезызве́стный писа́тель** танылған яҙыусы

**НЕБЕЗЫНТЕРЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡлы (ғына), ҡыҙыҡһыҙ уҡ булмаған; **небезынтере́сный расска́з** ҡыҙыҡлы ғына хикәйә

**НЕБЕЛЁНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* аҡланмаған, ағартылмаған; **небелёная ткань** ағартылмаған туҡыма; **небелёные сте́ны** ағартылмаған стеналар

**НЕБЕС...** *приставка см.* **небез...**

**НЕБЕСА́** *см.* **не́бо**

**НЕБЕСКОРЫ́СТНЫЙ,** -ая, -ое үҙ файҙаһын (ғына) күҙәткән; **небескоры́стная по́мощь** үҙ файҙаһын ғына күҙәткән ярҙам

**НЕБЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күк ...ы, күк йөҙөндәге; **небе́сный свод** күк көмбәҙе **2.** (*о цвете*) аҡһыл күк, аҡһыл күк төҫтәге; **оде́жда небе́сного цве́та** аҡһыл күк төҫтәге кейем ♦ **небе́сный меридиа́н** *астр.* күк меридианы

**НЕБЛАГОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ғәйепләрлек, йәмһеҙ, йүнһеҙ, насар; **неблагови́дный посту́пок** йәмһеҙ ҡыланыш

**НЕБЛАГОВОСПИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, тәрбиәһеҙ; **неблаговоспи́танный челове́к** әҙәпһеҙ кеше

**НЕБЛАГОДА́РНОСТЬ** *ж* ҡәҙер белмәү; **обвини́ть в неблагода́рности** ҡәҙер белмәүҙә ғәйепләү

**НЕБЛАГОДА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡәҙер белмәгән; **неблагода́рный челове́к** ҡәҙер белмәгән кеше **2.** нәтижәһеҙ, кәрәкһеҙ, файҙаһыҙ; **неблагода́рный труд** нәтижәһеҙ эш

**НЕБЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* уҫал (яуыз) теләктә (уйҙа) булыу, күрә алмаусанлыҡ; **прояви́ть неблагожела́тельность** күрә алмаусанлыҡ белдереү

**НЕБЛАГОЖЕЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уҫал теләкле, уҫаллыҡ (яуызлыҡ) теләүсе, уҫал ниәт менән эшләнгән; **неблагожела́тельный челове́к** уҫал теләкле кеше

**НЕБЛАГОЗВУ́ЧИЕ** *с* и **НЕБЛАГОЗВУ́ЧНОСТЬ** *ж* яғымһыҙлыҡ, аһәңһеҙлек, матур яңғырамау; **неблагозву́чность мело́дии** көйҙөң яғымһыҙлығы

**НЕБЛАГОЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое яғымһыҙ, аһәңһеҙ, матур яңғырамаған, ҡолаҡҡа ятышһыҙ; **неблагозву́чные стихи́** ҡолаҡҡа ятышһыҙ шиғырҙар

**НЕБЛАГОПОЛУ́ЧИЕ** *с* бәхетһеҙлек, күңелһеҙлек, тынысһыҙлыҡ, уңышһыҙлыҡ; **неблагополу́чие семьи́** ғаиләнең уңышһыҙлығы

**НЕБЛАГОПОЛУ́ЧНО 1.** *нареч.* уңышһыҙ, насар; **дела́ обстоя́т неблагополу́чно** эштәр насар тора **2.** *в знач. сказ., безл.* насар, һәйбәт (шәптән) түгел, тыныс түгел, тынынлыҡ (именлек) юҡ; **до́ма неблагополу́чно** өйҙә эштәр шәптән түгел

**НЕБЛАГОПОЛУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое уңышһыҙ, хәйерһеҙ, насар; **неблагополу́чное путеше́ствие** уңышһыҙ сәйәхәт

**НЕБЛАГОПРИСТО́ЙНОСТЬ** *ж* әҙәпһеҙлек, әҙәпһеҙ һүҙҙәр, тәрбиәһеҙлек, оятһыҙлыҡ; **говори́ть неблагопристо́йности** әҙәпһеҙ һүҙҙәр әйтеү

**НЕБЛАГОПРИСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ, оятһыҙ, килешһеҙ; **неблагопристо́йное поведе́ние** әҙәпһеҙ ҡылыҡ

**НЕБЛАГОПРИЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неудобный*) уңайһыҙ, лайыҡһыҙ, насар; **неблагоприя́тная обстано́вка** уңайһыҙ хәл **2.** (*отрицательный*) яйһыҙ, тиҫкәре; **неблагоприя́тный отве́т** тиҫкәре яуап

**НЕБЛАГОРАЗУ́МИЕ** *с* аҡылһыҙлыҡ, дыуамаллыҡ; **проявля́ть неблагоразу́мие** дыуамаллыҡ күрһәтеү

**НЕБЛАГОРАЗУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аҡылһыҙ, дыуамал, уйламай эшләнгән; **неблагоразу́мный челове́к** аҡылһыҙ кеше

**НЕБЛАГОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** намыҫһыҙ, түбән; **неблагоро́дный посту́пок** намыҫһыҙ ҡылыҡ **2.** (*грубоватый, неизящный*) тупаҫ, йәмһеҙ; **неблагоро́дная вне́шность** йәмһеҙ ҡиәфәт ♦ **неблагоро́дные мета́ллы** затһыҙ металдар (*баҡыр, ҡурғаш, тимер һ.б.*)

**НЕБЛАГОСКЛО́ННОСТЬ** *ж* яғымһыҙлыҡ, һалҡынлыҡ, хуп күрмәү; **неблагоскло́нность отноше́ния** мөнәсәбәттәрҙең һалҡынлығы

**НЕБЛАГОСКЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое яғымһыҙ, һалҡын; **неблагоскло́нный взгляд** һалҡын ҡараш; **неблагоскло́нный стари́к** яғымһыҙ ҡарт

**НЕБЛАГОУСТРО́ЕННОСТЬ** *ж* төҙөкләндерелмәгән булыу, уңайһыҙ, уңайлыҡ булмау; **неблагоустро́енность до́ма** өйҙөң уңайлығы булмау(ы)

**НЕБЛАГОУСТРО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое тәртипкә һалынмаған, уңайлыҡтары булмаған, төҙөкләндерелмәгән; **неблагоустро́енный райо́н** төҙөкләндерелмәгән район

**НЕБЛЕСТЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее яҡшынан (шәптән, һәйбәт) түгел, уртаса; **неблестя́щий отве́т** уртаса яуап

**НЁБНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аңҡау ...ы; **нёбные ко́сти** аңҡау һөйәктәре **2.** *лингв.* аңҡау ...ы; **нёб-**

**ные согла́сные** аңҡау тартынҡылары ♦ **нёбная занаве́ска** аңҡау пәрҙәһе

**НЕ́БО** *с* күк, күк йөҙө; **си́нее не́бо** зәңгәр күк; **не́бо покры́то ту́чами** күк йөҙө болоттар менән ҡапланған ♦ **до небе́с вознести́ (превознести́)** артыҡ маҡтау, күккә күтәреү; **не́бо с овчи́нку (в овчи́нку) показа́лось** *кому* ҡурҡҡанға ҡуш күренә; **как (как бу́дто, то́чно и т.п.) с не́ба упа́л (свали́лся)**: 1) ҡапыл, көтмәгәндә килеп сығыу, күктән төшкәндәй булыу; 2) бөтә кеше аңлағанды аңламау; **ме́жду не́бом и землёй (жить, быть, находи́ться)** ер менән күк араһында (йәшәү, булыу); **не́бу жа́рко (ста́нет)** ҡайҙа барырға белмәҫһең, ҡайҙа инергә тишек таба алмаҫһың; **на седьмо́м не́бе** атҡа менгәндәй булыу, ныҡ шатланыу; **под откры́тым не́бом** *см.* **откры́тый**

**НЁБО** *с* аңҡау; **язы́к прили́п к нёбу** тел аңҡауға йәбешкән, өндәшә алмай

**НЕБОГА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*бедный*) ярлы, урта(са) хәлле, бай түгел (булмаған); **небога́тые лю́ди** урта хәлле кешеләр **2.** (*недорогой по убранству*) сикле, самалы, ябай ғына -ҡан/-ған; **небога́тый кабине́т** ябай ғына йыһазландырылған бүлмә **3.** ярлы, бай түгел; **у него́ небога́тый запа́с слов** уның һүҙ запасы бай түгел

**НЕБОЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* һуғышҡа һәләтһеҙлек (булдыҡһыҙлыҡ); **небоеспосо́бность отря́да** отрядтың һуғышҡа һәләтһеҙлеге

**НЕБОЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое һуғышҡа һәләтһеҙ (булдыҡһыҙ); **небоеспосо́бный кора́бль** һуғышҡа һәләтһеҙ карап

**НЕБОЛЬШО́Й,** -ая, -ое **1.** ҙур түгел (булмаған), бәләкәй; **небольшо́й отря́д** бәләкәй отряд **2.** аҙ, аҙ ғына, күп булмаған (түгел), ҙур (көслө) булмаған (түгел); **небольшо́й отре́зок вре́мени** аҙ ғына ваҡыт; **глубина́ реки́ небольша́я** йылға тәрән түгел ♦ **с небольши́м** аҙ ғына артыҡ; **час с небольши́м** сәғәттән аҙ ғына артыҡ; **де́ло ста́ло за небольши́м** эш аҙҙа ғына (тороп) ҡалды

**НЕБОСВО́Д** *м* күк көмбәҙе, күк йөҙө; **небосво́д затяну́ло ту́чами** күк йөҙөн болот ҡаплап алды

**НЕБОСКЛО́Н** *м* күк йөҙө (*күктең офоҡ өҫтөндәге өлөшө*); **голубо́й небоскло́н** зәңгәр күк йөҙө

**НЕБОСКРЁБ** *м* бейек (күп ҡатлы) йорт

**НЕБО́СЬ** *вводн. сл.*; *прост.* (*ведь, наверное и т.п.*) булһа кәрәк, әлбиттә, -дыр/-дер, моғайын; **уста́л, небо́сь** арығанһыңдыр, моғайын; **они́, небо́сь, давно́ прие́хали** улар күптән килгәндер, моғайын

**НЕБРЕ́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* иғтибарһыҙлыҡ күрһәтеү, иғтибарһыҙ (һалҡын) ҡарау; **небре́жничать в рабо́те** эшкә иғтибарһыҙ ҡарау

**НЕБРЕ́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** иғтибарһыҙлыҡ, иғтибарһыҙ булыу; **проявля́ть небре́жность в собира́нии фа́ктов** факттар йыйыуҙа иғтибарһыҙлыҡ күрһәтеү **2.** урынына (еренә) еткереп эшләмәү, ҡытыршылыҡ; **небре́жность фра́зы** һөйләмдең ҡытыршылығы **3.** (*состояние запущенности, заброшенности*) ташландыҡ хәлдә булыу, йыйнаҡһыҙлыҡ

**НЕБРЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*выражающий невнимание, пренебрежение*) илтифатһыҙ, ихтирамһыҙ, арамъя; **небре́жный отве́т** илтифатһыҙ яуап; **небре́жное обраще́ние** ихтирамһыҙ мөғәмәлә **2.** (*неряшливо сделанный*) унан-бынан (арлы-бирле, нисек етте шулай) эшләнгән, насар, иғтибарһыҙ башҡарылған; **небре́жная рабо́та** арлы-бирле эшләнгән эш; **у него́ небре́жный по́черк** уның яҙыуы насар

**НЕБРО́СКИЙ,** -ая, -ое күҙгә бәрелеп тормаған, баҙыҡ булмаған, үтә асыҡ булмаған, тоноҡ; **небро́ский узо́р** күҙгә бәрелеп тормаған биҙәк

**НЕБЫВА́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғәҙәттән тыш, ғәҙәти булмаған, быға саҡлы булмаған (күрелмәгән), оҡшашы (тиңдәше) булмаған, иҫ киткес; **небыва́лое происше́ствие** иҫ киткес ваҡиға **2.** (*вымышленный*) уйҙырма, уйлап сығарылған; **небыва́лые фа́кты** уйҙырма фактлар

**НЕБЫЛИ́ЦА** и **НЕБЫВА́ЛЬЩИНА** *ж*; *разг.* **1.** (*вымысел*) ялған, уйҙырма, туҙға яҙмаған һүҙ (хәбәр); **расска́зывать небыли́цы** туҙға яҙмаған һүҙ һөйләү **2.** (*сказка*) әкиәт, фантастик хикәйә

**НЕБЫТИЕ́** *с* юҡлыҡ, йәшәйештең юҡлығы; **мы́сли о небытии́** йәшәйештең юҡлығы тураһындағы уйҙар

**НЕБЬЮ́ЩИЙСЯ,** -аяся, -ееся ватылмай (ярылмай) торған; **небью́щееся стекло́** ватылмай торған быяла

**НЕВА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*несущественный*) әһәмиәтһеҙ, мөһим булмаған, ваҡ; **нева́жный вопро́с** ваҡ мәсьәлә **2.** *разг.* ( *не вполне хороший*) бик шәптән түгел, насар, хөрт; **дела́ нева́жные** эш(тәр) хөрт

**НЕВАЛЯ́ШКА** *ж*; *разг.* (аумаҫ) ҡурсаҡ

**НЕВДАЛЕКЕ́** и **НЕВДАЛИ́** *нареч.* яҡында, алыҫ түгел, эргәлә; **невдалеке́ мерца́ют огни́** яҡында ғына уттар емелдәй

**НЕВДОМЁК** *кому в знач. сказ.*, *безл.*; *разг.* һиҙенмәү, башҡа килмәү, төшөнмәү, аңламау, төшөнә (аңлай) алмау, төшөнмәй (аңламай) ҡалыу; **ему́ и невдомёк** уның башына ла килмәй

**НЕВЕ́ДЕНИЕ** *с* хәбәрһеҙлек, мәғлүмәтһеҙлек, хәбәрҙар булмау; **быть в неве́дении** хәбәрҙар булмау

**НЕВЕ́ДОМО** *нареч.*; *разг.* (*обычно в сочетании с "кто", "что", "какой", "как", "куда" и т.п.*) әллә, белмәйем, -дыр/-дер; **неве́домо кто** кемдер, әллә кем; **неве́домо что** әллә нәмә; **неве́домо где** ҡайҙалыр

**НЕВЕ́ДОМЫЙ,** -ая, -ое **1.** билдәһеҙ, билдәле булмаған, белмәгән-күрмәгән; **неве́домые стра́ны**

белмәгән-күрмәгән илдәр **2.** ғәжәп, хәтәр, сихри, серле; **невéдомая сúла** ғәжәп бер көс

**НЕВÉЖА** *м* и *ж* тупаҫ, әҙәпһеҙ

**НЕВÉЖДА** *м* и *ж* наҙан, белемһеҙ, томана; **крýглый невéжда** шыр наҙан

**НЕВÉЖЕСТВЕННОСТЬ** *ж* наҙанлыҡ; **упрекнýть в невéжественности** наҙанлыҡта ғәйепләү

**НЕВÉЖЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое наҙан, белемһеҙ, томана; **невéжественный человéк** наҙан кеше

**НЕВÉЖЕСТВО** *с* **1.** *см.* **невéжественность 2.** *разг.* (*невежливость*) әҙәпһеҙлек, тәрбиәһеҙлек, тупаҫлыҡ; **борóться с невéжеством** әҙәпһеҙлеккә ҡаршы көрәшеү

**НЕВÉЖЛИВОСТЬ** *ж* әҙәпһеҙлек, тәрбиәһеҙлек, тупаҫлыҡ; **показáть невéжливость** әҙәпһеҙлек күрһәтеү

**НЕВÉЖЛИВЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, тәрбиәһеҙ, илтифатһыҙ, тупаҫ; **невéжливое обращéние** тупаҫ мөғәмәлә

**НЕВЕЗÉНИЕ** *с*; *разг.* уңышһыҙлыҡ, (эштәрҙең) кирегә китеүе, эш уңмау (бармау), юл уңмау; **полосá невезéния** (эштәрҙең) гел кирегә китеү осоро

**НЕВЕЗÝЧИЙ,** -ая, -ее *разг.* эше уңмай торған, кире, уңмаҫ; **невезýчий человéк** уңмаҫ кеше

**НЕВЕЛИ́КИЙ,** -ая, -ое **1.** (*небольшой по размеру*) ҙур түгел, бәләкәй; **невели́к рóстом** буйға ҙур түгел **2.** (*незначительный*) әһәмиәте аҙ, ҙур түгел; **грех невели́к** гөнаһ ҙур түгел

**НЕВЕЛИ́ЧКА** *м* и *ж*; *трад.-поэт.*, *разг.* тәбәнәк, кескәй; **рóстом невели́чка** тәбәнәк буйлы; **пти́чка-невели́чка** ҡошсоҡ, кескәй ҡош

**НЕВÉРИЕ** *с* **1.** ышанмау(сылыҡ); **невéрие в свои́ си́лы** үҙ көсөңә ышанмау **2.** (*атеизм*) аллаға ышанмау, динһеҙлек, дәһрилек; **невéрие в бóга** аллаға ышанмау

**НЕВÉРНОСТЬ** *ж* **1.** дөрөҫ булмау, яңылышлыҡ, яңылыш булыу, хаталыҡ, хата булыу; **невéрность отвéта** яуаптың яңылыш булыуы **2.** (*измена*) хыянатсыл (тоғролоҡһоҙ) булыу; **невéрность дрýга** дуҫтың хыянатсыл булыуы

**НЕВÉРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неправильный*) яңылыш, хата, дөрөҫ түгел (булмаған); **невéрный вы́вод** яңылыш һөҙөмтә **2.** тоғро булмау, тоғролоҡһоҙ, хыянатсыл, хыянат итеүсе, ышанысһыҙ; **невéрный муж** ҡатынына хыянат итеүсе ир; **невéрный своемý слóву** һүҙенә тоғро булмау **3.** *в знач. сущ.* **невéрный** *м* и **невéрная** *ж*; *уст.* башҡа дин тотоусы ♦ **Фомá невéрный** бер нәмәгә лә ышанмай торған кеше

**НЕВЕРОЯ́ТНОСТЬ** *ж* и **НЕВЕРОЯ́ТИЕ** *с* кеше ышанмаҫлыҡ, аҡылға һыймаҫлыҡ; **невероя́тность собы́тий** ваҡиғаларҙың аҡылға һыймаҫлыҡ булыуы ♦ **до невероя́тности** бигерәк, ғәҙәттән (сиктән) тыш, иҫ китмәле

**НЕВЕРОЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кеше ышанмаҫлыҡ, башҡа (аҡылға) һыймаҫлыҡ, ғәҙәти булмаған; **невероя́тная истóрия** ғәҙәти булмаған ваҡиға **2.** ғәҙәттән (сиктән) тыш; **невероя́тная быстротá** сиктән тыш тиҙлек

**НЕВÉРУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** динһеҙ, аллаһыҙ, аллаға ышанмаған, дәһри; **невéрующий человéк** аллаға ышанмаған кеше **2.** *в знач. сущ.* **невéрующий** *м* и **невéрующая** *ж* аллаға ышанмаған (динһеҙ) кеше

**НЕВЕСЁЛЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* күңелһеҙ, моңһоу, яманһыу, көйһөҙ, кәйефһеҙ; **невесёлый ребёнок** күңелһеҙ бала; **невесёлая улы́бка** моңһоу йылмайыу; **невесёлое мéсто** күңелһеҙ урын

**НЕВЕСÓМОСТЬ** *ж* ауырлыҡ юғалтыу; **услóвия невесóмости** ауырлыҡ юғалтыу шарттары

**НЕВЕСÓМЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*лёгкий*) ауырлығы булмаған, еңел; **невесóмые бéлые облакá** еңел аҡ болоттар **2.** *перен.* (*незначительный, маловажный*) әһәмиәте аҙ, әһәмиәтһеҙ, нигеҙһеҙ, көсһөҙ; **невесóмые аргумéнты** нигеҙһеҙ дәлилдәр

**НЕВÉСТА** *ж* **1.** кәләш; **вы́брать невéсту** кәләш һайлап алыу **2.** *разг.* (*совершеннолетняя девушка*) буйға еткән ҡыҙ

**НЕВÉСТИН,** -а, -о (еткән) ҡыҙ ...ы; **невéстино придáное** ҡыҙ бирнәһе

**НЕВÉСТКА** *ж* (*жена сына или младшего брата*) килен; (*жена старшего брата*) еңгә, еңгәй; (*жёны братьев по отношению друг к другу*) апһын, килендәш ♦ **невéстке в отмéстку (сдéлать)** *что* үс итеп (эшләү), үс алыу

**НЕВÉСТЬ** *нареч.*; *разг.* (*обычно в сочетании с "кто", "что", "какой", "как", "куда", "где" и т.п.*) әллә; **невéсть кто** әллә кем; **невéсть что** әллә нимә; **невéсть какóй** әллә ниндәй

**НЕВЕЩÉСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое рухи, матди булмаған, ысынбарлыҡтан алыҫ

**НЕВЗВИ́ДЕТЬ: невзви́деть свéта** (*от боли, страха, обиды, злобы и т.п.*) күҙгә аҡ-ҡара күренмәү, донъяны күрге килмәү

**НЕВЗГÓДА** *ж* михнәт(тәр), бәхетһеҙлек(тәр), ҡайғы-хәсрәт(тәр), ауырлыҡ(тар), ҡыйынлыҡ(тар); **терпéть невзгóды** ҡайғы-хәсрәт күреү

**НЕВЗИРÁЯ: невзирáя на** *предлог с вин. п.* (*вопреки*) ҡарамаҫтан; **невзирáя на жарý** эҫе булыуға ҡарамаҫтан ♦ **невзирáя на ли́ца** кемдең кем булыуына ҡарамаҫтан

**НЕВЗЛЮБИ́ТЬ** *сов. кого-что* күрә алмау, яратмау, оҡшатмау; **невзлюби́ть с пéрвого взгля́да** тәү ҡараштан уҡ яратмау

**НЕВЗНАЧÁЙ** *нареч.* көтмәҫтән, көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән, аңғармаҫтан, абайламаҫтан; **встрéтиться невзначáй** көтмәгәндә осрашыу

**НЕВЗНÓС** *м* (аҡса) түләмәү; **невзнóс квартúрной плáты** торлаҡ өсөн аҡса түләмәү

**НЕВЗРÁЧНОСТЬ** *ж* төҫһөҙ булыу, йәмһеҙ (күркһеҙ) булыу, йәмһеҙлек, күркһеҙлек

**НЕВЗРА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое төҫһөҙ, йәмһеҙ, күркһеҙ, килбәтһеҙ; **невзра́чная фигу́ра** килбәтһеҙ кәүҙә

**НЕВЗЫСКА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* талымһыҙлыҡ, талымһыҙ булыу; **невзыска́тельность в еде́** ашауға талымһыҙ булыу

**НЕВЗЫСКА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое талымһыҙ, аҙға (аҙ менән) ҡәнәғәт булған, талапһыҙ; **невзыска́тельный зри́тель** талапһыҙ тамашасы; **невзыска́тельный на корм** аҙыҡҡа талымһыҙ

**НЕ́ВИДАЛЬ: вот не́видаль**; **что за не́видаль**; **кака́я (э́кая, э́ка) не́видаль** *пренебр.* был ни ғәжәп, иҫ киткес нәмә икән, ай-һай, харап икән, иҫең киткән икән

**НЕВИ́ДАННЫЙ,** -ая, -ое иҫ киткес, әлегәсә күрелмәгән (булмаған); **неви́данный слу́чай** әлегәсә күрелмәгән хәл

**НЕВИДИ́МКА** *м* и *ж* **1.** күҙгә күренмәй торған йән эйәһе; **челове́к-невиди́мка** күҙгә күренмәй торған кеше **2.** (*шпилька*) сәс ҡыҫтырғыс ♦ **ша́пка-невиди́мка** тылсымлы бүрек (*әкиәттәрҙә кешене күҙгә күренмәҫ итә торған*)

**НЕВИ́ДИМЫЙ,** -ая, -ое күҙгә күренмәй торған (күренмәгән, күренмәҫ), йәшерен, йәшертен; **неви́димый шов** йәшертен йөй; **неви́димая си́ла** йәшерен көс

**НЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*недоступный зрению*) (күҙгә) күренмәй торған **2.** (*незначительный*) әһәмиәтһеҙ, әһәмиәте аҙ, күренекһеҙ, бәләкәй; **неви́дная до́лжность** бәләкәй вазифа **3.** *разг.* (*невзрачный*) төҫһөҙ, күркһеҙ, йәмһеҙ; **неви́дная вне́шность** йәмһеҙ ҡиәфәт

**НЕВИ́ДЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** һуҡыр, насар күреүсе; **неви́дящие глаза́** һуҡыр күҙҙәр **2.** (*рассеянный*) иғтибарһыҙ; **неви́дящий взор (взгляд)** иғтибарһыҙ ҡараш

**НЕВИ́ННОСТЬ** *ж* **1.** (*невиновность*) ғәйепһеҙлек, гөнаһһыҙлыҡ; **доказа́ть неви́нность подсуди́мого** хөкөм ителеүсенең ғәйепһеҙлеген иҫбатлау (таныу) **2.** (*наивность*) бер ҡатлылыҡ, саф күңеллелек, хәйләһеҙлек, эскерһеҙлек; **неви́нность ребёнка** сабыйҙың гөнаһһыҙлығы (бер ҡатлылығы) **3.** (*девственность*) сафлыҡ, ғиффәтлелек

**НЕВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*невиновный*) ғәйепһеҙ, гөнаһһыҙ; **неви́нные лю́ди** гөнаһһыҙ кешеләр **2.** (*наивный*) саф күңелле, бер ҡатлы, хәйләһеҙ, эскерһеҙ; **неви́нное созда́ние** саф күңелле йән (эйәһе) **3.** (*безобидный*) хәтер ҡалдырмаҫлыҡ (ҡалмаҫлыҡ), рәнйетмәй торған, зыянһыҙ; **неви́нный разгово́р** зыянһыҙ һөйләшеү **4.** (*девственный*, *целомудренный*) саф, ғиффәтле; **неви́нная де́вушка** ғиффәтле ҡыҙ

**НЕВИНО́ВНОСТЬ** *ж* ғәйепһеҙлек, гөнаһһыҙлыҡ; **доказа́ть невино́вность** ғәйепһеҙлекте иҫбатлау

**НЕВИНО́ВНЫЙ,** -ая, -ое ғәйепһеҙ, гөнаһһыҙ; **невино́вный ребёнок** ғәйепһеҙ бала

**НЕВКУ́СНЫЙ,** -ая, -ое тәмһеҙ, татлы булмаған; **невку́сная пи́ща** тәмһеҙ аш

**НЕВМЕНЯ́ЕМОСТЬ** *ж* иҫһеҙлек, ни эшләгәнен белмәү (*психик хәл*); **состоя́ние невменя́емости** иҫһеҙлек хәле

**НЕВМЕНЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое иҫһеҙ, иҫен юйған, ни эшләгәнен белмәгән; **невменя́емый от гне́ва** асыуҙан иҫен юйған

**НЕВМЕША́ТЕЛЬСТВО** *с* ҡыҫылмау(сылыҡ), тығылмау(сылыҡ); **невмеша́тельство в дела́ други́х госуда́рств** башҡа дәүләттәрҙең эшенә ҡыҫылмау

**НЕВМОГОТУ́** и **НЕВМО́ЧЬ** *нареч. в знач. сказ.*; *разг.* түҙерлек (сыҙарлыҡ) түгел (хәл ҡалманы); **ста́ло невмоготу́ ждать** көтөрлөк хәл ҡалманы; **ста́ло невмоготу́ жить** йәшәрлек хәл ҡалманы

**НЕВНИМА́НИЕ** *с* **1.** (*рассеянность, отсутствие внимания*) иғтибарһыҙлыҡ; **сде́лать оши́бку по невнима́нию** иғтибарһыҙлыҡ арҡаһында хата ебәреү **2.** илтифатһыҙлыҡ, ихтирамһыҙлыҡ; **проявля́ть невнима́ние к ста́ршим** ололарға илтифатһыҙлыҡ күрһәтеү

**НЕВНИМА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** *см.* **невнима́ние** 1; **2.** (*равнодушие*) вайымһыҙлыҡ, иҫ китмәүсәнлек, ҡыҙыҡһынмаусанлыҡ; **проявля́ть невнима́тельность к дру́гу** дуҫыңа ҡарата вайымһыҙлыҡ күрһәтеү

**НЕВНИМА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*рассеянный*) иғтибарһыҙ; **невнима́тельный учени́к** иғтибарһыҙ уҡыусы **2.** (*равнодушный*) иғтибарһыҙ, вайымһыҙ; **невнима́тельная хозя́йка** вайымһыҙ хужабикә **3.** (*непочтительный*, *неуважительный*) илтифатһыҙ, кеселекһеҙ, ихтирамһыҙ

**НЕВНЯ́ТИЦА** *ж*; *разг.* аңлайышһыҙ һүҙҙәр; **плести́ невня́тицу** аңлайышһыҙ һүҙҙәр һөйләү

**НЕВНЯ́ТНОСТЬ** *ж* аңлайышһыҙлыҡ, аңлайышһыҙ булыу; **невня́тность произноше́ния** әйтелештең аңлайышһыҙ булыуы

**НЕВНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое аңлайышһыҙ, ишетелер-ишетелмәҫ; **невня́тные голоса́** ишетелер-ишетелмәҫ тауыштар

**НЕ́ВОД** *м* йылым; **выта́скивать не́вод** йылымды тартып сығарыу

**НЕВОЗВРАТИ́МОСТЬ** *ж* кире ҡайтмау (ҡабатланмау)

**НЕВОЗВРА́ТНЫЙ** и **НЕВОЗВРАТИ́МЫЙ,** -ая, -ое кире ҡайтмаҫ (ҡабатланмаҫ, ҡайтарылмаҫ), үкенесле, кире ҡайтарылмай (ҡабатланмай) торған; **невозвра́тное про́шлое** кире ҡайтмаҫ үткәндәр

**НЕВОЗВРА́ТНОСТЬ** *ж см.* **невозврати́мость**

**НЕВОЗДЕ́ЛАННОСТЬ** *ж* эшкәртелмәгәнлек, эшкәртелмәгән булыу; **невозде́ланность по́чвы** ерҙең эшкәртелмәгән булыуы

**НЕВОЗДЕ́ЛАННЫЙ,** -ая, -ое эшкәртелмәгән; **невозде́ланное по́ле** эшкәртелмәгән баҫыу

**НЕВОЗДЕРЖА́НИЕ** *с* и **НЕВОЗДЕ́РЖАННОСТЬ** *ж* тотанаҡһыҙлыҡ, тотороҡһоҙлоҡ, тыйнаҡһыҙлыҡ, һаҡһыҙлыҡ; **прояви́ть невозде́ржанность** тотанаҡһыҙлыҡ күрһәтеү

**НЕВОЗДЕ́РЖАННЫЙ,** -ая, -ое тотанаҡһыҙ, тыйнаҡһыҙ, һаҡһыҙ; **невозде́ржанный в пи́ще** ашауҙа тыйнаҡһыҙ

**НЕВОЗМО́ЖНО 1.** *в знач. сказ., безл.* мөмкин түгел, -мау/-мәү; **невозмо́жно забы́ть** онотоу мөмкин түгел, оноторлоҡ түгел **2.** *нареч.*; *разг.* бик, бигерәк, ғәҙәттән (сиктән) тыш, үтә; **здесь доро́га невозмо́жно у́зкая** бында юл бигерәк тар

**НЕВОЗМО́ЖНОСТЬ** *ж* мөмкин(лек) булмау, мөмкин түгеллек; **жа́ловаться на невозмо́жность отдохну́ть** ял итергә мөмкинлек булмауға зарланыу ♦ **до невозмо́жности** бик, бигерәк, сиктән тыш, үтә

**НЕВОЗМО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*невыполнимый*) мөмкин булмаған, тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ; **невозмо́жные за́мыслы** тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ ниәттәр **2.** *разг.* (*нестерпимый*) түҙә алмаҫлыҡ, сыҙамаҫлыҡ, сыҙай алмаҫлыҡ, йәнгә тейгес; **невозмо́жная жара́** түҙә алмаҫлыҡ эҫе; **невозмо́жная головна́я боль** сыҙай алмаҫлыҡ баш ауыртыуы **3.** (*чрезвычайный по силе, интенсивности проявления и т.п.*) бик, сиктән тыш, үтә (ныҡ, күп) **4.** *разг.* (*недопустимый*) һис тә ярамай торған, рөхсәт итмәҫлек; **невозмо́жный тон** һис тә ярамай торған тон **5.** *в знач. сущ.* **невозмо́жное** *с* мөмкин булмаған нәмә; **невозмо́жного нет** мөмкин булмаған нәмә юҡ

**НЕВОЗМУТИ́МОСТЬ** *ж* артыҡ тыныс (бошмаҫ, сабыр) булыу

**НЕВОЗМУТИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** тыныс, үҙ-үҙен тота белеүсән, иҫе китмәүсән; **невозмути́мый хара́ктер** тыныс тәбиғәтле (кеше) **2.** (*ничем не нарушаемый*) тәрән, тулы; **невозмути́мая тишина́** тәрән тынлыҡ

**НЕВОЗНАГРАДИ́МЫЙ,** -ая, -ое бик ҙур (әһәмиәтле), әжерен түләп бөтөргөһөҙ; **невознагради́мая утра́та** бик ҙур юғалтыу

**НЕВО́ЛИТЬ** *несов. кого-что* ирекһеҙләү, көсләү, мәжбүр итеү; **нево́лить уступи́ть** ҡаршы килмәҫкә мәжбүр итеү

**НЕВО́ЛЬНИК** *м* и **НЕВО́ЛЬНИЦА** *ж* **1.** ҡол, тотҡон; **сде́лать нево́льником** ҡол итеү **2.** *уст.* (*пленник и пленница*) әсир

**НЕВО́ЛЬНИЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ҡол(лоҡ) ...ы, тотҡон ...ы, әсир ...ы, ҡолдарға (әсирҙәргә) хас; **нево́льническое положе́ние** ҡол хәле

**НЕВО́ЛЬНИЧЕСТВО** *с* ҡоллоҡ, тотҡонлоҡ, әсирлек; **томи́ться в нево́льничестве** ҡоллоҡта интегеү

**НЕВО́ЛЬНИЧИЙ,** -ья, -ье ҡол(дар) ...ы, тотҡон ...ы, әсир ...ы; **нево́льничий труд** ҡол хеҙмәте

**НЕВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*неумышленный, случайный*) аңғармаҫтан (осраҡлы рәүештә) эшләнгән; **нево́льная оши́бка** аңғармаҫтан эшләнгән хата **2.** (*непроизвольный*) ихтыярһыҙ; **нево́льный вздох** ихтыярһыҙ көрһөнөү **3.** (*вынужденный*) ирекһеҙҙән, сараһыҙҙан, мәжбүри; **нево́льное призна́ние вины́** ирекһеҙҙән ғәйебеңде таныу

**НЕВО́ЛЯ** *ж* **1.** (*рабство*) ҡоллоҡ, (*плен*) тотҡонлоҡ, әсирлек **2.** *прост.* кәрәклек, зарурлыҡ

**НЕВООБРАЗИ́МЫЙ,** -ая, -ое күҙ алдына ла килтергеһеҙ, ғәҙәттән тыш, иҫ киткес; **невообрази́мый хо́лод** иҫ киткес һыуыҡ

**НЕВООРУЖЁННЫЙ,** -ая, -ое ҡоралланмаған, ҡоралһыҙ; **невооружённая охра́на** ҡоралланмаған һаҡсылар ♦ **невооружённым гла́зом** ябай күҙ менән (*оптик приборҙар ярҙамынан башҡа*)

**НЕВОСПИ́ТАННОСТЬ** *ж* тәрбиәһеҙлек, әҙәпһеҙлек; **невоспи́танность ребёнка** баланың әҙәпһеҙлеге

**НЕВОСПИ́ТАННЫЙ,** -ая, -ое тәрбиәһеҙ, әҙәпһеҙ; **невоспи́танный челове́к** тәрбиәһеҙ кеше

**НЕВОСПОЛНИ́МОСТЬ** *ж* һис кем (һис нәмә) менән алмаштырмаҫлыҡ (булыу), алмаштырыу мөмкин булмаған; **невосполни́мость поте́ри** юғалтыуҙың һис нәмә менән алмаштырмаҫлыҡ булыуы

**НЕВОСПОЛНИ́МЫЙ,** -ая, -ое һис кем (һис нәмә) менән алмаштыра алмаҫлыҡ; **невосполни́мый уро́н** һис нәмә (бер ни) менән алмаштыра алмаҫлыҡ зыян

**НЕВОСПРИИ́МЧИВОСТЬ** *ж* **1.** аңламаусанлыҡ, аңралыҡ, аңышлыҡ, маҡаулыҡ; **невосприи́мчивость ребёнка** баланың аңышлығы **2.** *мед., биол.* бирешмәүсәнлек; **невосприи́мчивость к боле́зням** сирҙәргә бирешмәүсәнлек

**НЕВОСПРИИ́МЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** аңра, аңыш, маҡау, зиһенһеҙ, аҡым **2.** *мед., биол.* бирешмәүсән; **невосприи́мчивый к просту́де** һыуыҡҡа бирешмәүсән

**НЕВОСТРЕ́БОВАННЫЙ,** -ая, -ое (эйәһе тарафынан) алынмаған, алынмай ҡалған; **невостре́бованный груз** алынмай ҡалған йөк

**НЕВПОПА́Д** *нареч.*; *разг.* урынһыҙ, хата, яңылыш; **отвеча́ть невпопа́д** яңылыш яуап биреү

**НЕВРАЗУМИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* аңлайышһыҙлыҡ, буталсыҡлыҡ; **невразуми́тельность отве́та** яуаптың аңлайышһыҙлығы

**НЕВРАЗУМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аңлайышһыҙ, буталсыҡ, томанлы; **невразуми́тельный рису́нок** аңлайышһыҙ һүрәт

**НЕВРАЛГИ́Я** *ж*; *мед.* невралгия (*нервылар ауырыуы*)

**НЕВРАСТЕ́НИК** *м* и **НЕВРАСТЕНИ́ЧКА** *ж* неврастения менән ауырыусы

**НЕВРАСТЕНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** неврастения ...ы, неврастеник; **неврастени́ческие симп-**

**то́мы** неврастения менән ауырыу билгеләре **2.** неврастения менән ауырыусыларға хас; **неврастени́ческое лицо́** неврастения менән ауырыусыларға хас йөҙ

**НЕВРАСТЕНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** неврастеник, неврастения менән ауырыусыларға хас; **неврастени́чная раздражи́тельность** неврастения менән ауырыусыларға хас (булған) ҡыҙыулыҡ **2.** неврастения менән ауырыусы; **неврастени́чный челове́к** неврастения менән ауырыусы кеше

**НЕВРАСТЕНИ́Я** *ж*; *мед.* неврастения (*нервы ауырыуы*)

**НЕВРЕДИ́МОСТЬ** *ж* һау-сәләмәт (имен, иҫән-һау) булыу ♦ **в це́лости и невреди́мости** һау-сәләмәт, имен, иҫән-һау

**НЕВРЕДИ́МЫЙ,** -ая, -ое һау-сәләмәт, имен, иҫән-һау; **верну́ться с войны́ невреди́мым** һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтыу

**НЕВРЕ́ДНЫЙ,** -ая, -ое зыянһыҙ, зарарһыҙ; **невре́дные вещества́** зарарһыҙ матдәләр; **невре́дный челове́к** зыянһыҙ кеше

**НЕВРИ́Т** *м*; *мед.* неврит (*нервы шешеүе ауырыуы*)

**НЕВРО́З** *м*; *мед.* невроз (*ҙәк нервы системаһының ауырыуы*); **невро́з се́рдца** йөрәк неврозы

**НЕВРО́ЛОГ** *м* невролог (*неврология өлкәһендәге белгес*)

**НЕВРОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое неврология ...ы; **неврологи́ческая кли́ника** неврология клиникаһы

**НЕВРОЛО́ГИЯ** *ж* неврология (*нервы системаһы һәм уның ауырыуҙары тураһындағы фән*)

**НЕВРОПАТО́ЛОГ** *м* невропатолог (*невропатология өлкәһендәге белгес*)

**НЕВРОПАТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое невропатология ...ы, неврапатологик; **невропатологи́ческие иссле́дования** невропатологик тикшеренеүҙәр

**НЕВРОПАТОЛО́ГИЯ** *ж* невропатология (*нервы системаһының ауырыуҙары тураһындағы фән*)

**НЕВРОТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое невроз ...ы; **невроти́ческие симпто́мы** невроз менән ауырыу билгеләре (симптомдары)

**НЕВТЕРПЁЖ** *нареч. в знач. сказ.*; *прост.* түҙерлек (сыҙарлыҡ) түгел, түҙер (сыҙар) хәл ҡалмау; **невтерпёж от хо́лода** һыуыҡҡа түҙерлек түгел

**НЕВЫ́ГОДА** *ж* зыян, зарар, файҙаһыҙ яҡ; **терпе́ть невы́году** зыян күреү

**НЕВЫ́ГОДНО 1.** *нареч.* файҙаһыҙ, мәғәнәһеҙ, буш, табышһыҙ, насар (тиҫкәре) яҡ; **невы́годно прода́ть** табышһыҙ һатыу; **невы́годно отлича́ться** насар яҡ менән айырылып тороу **2.** *в знач. сказ.* файҙаһыҙ, отошһоҙ; **мне э́то невы́годно** был минең өсөн файҙаһыҙ

**НЕВЫ́ГОДНОСТЬ** *ж* **1.** (*убыточность*) өҫтәмә мал (аҡса) килтермәү, төшөмһөҙ булыу, файҙаһыҙлыҡ, отошһоҙ; **невы́годность сде́лки** килешеүҙең файҙаһыҙлығы **2.** (*неблагоприятность*) уңайһыҙлыҡ, яйһыҙлыҡ; **невы́годность положе́ния** хәлдең уңайһыҙлығы

**НЕВЫ́ГОДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** өҫтәмә мал (аҡса) килтермәгән, төшөмһөҙ, зыянлы, зарарлы, файҙаһыҙ, отошһоҙ; **невы́годное де́ло** файҙаһыҙ эш **2.** уңайһыҙ, яйһыҙ, ҡулайһыҙ, насар; **показа́ть себя́ с невы́годной стороны́** үҙеңде насар яҡтан күрһәтеү **3.** (*о внешности*) күркһеҙ, яғымһыҙ, күңелгә ятышһыҙ; **невы́годная нару́жность** күркһеҙ ҡиәфәт

**НЕВЫ́ДЕРЖАННОСТЬ** *ж* **1.** тотороҡһоҙлоҡ; **невы́держанность сти́ля** стилдең тотороҡһоҙлоғо **2.** тотанаҡһыҙлыҡ; **невы́держанность хара́ктера** холоҡтоң тотанаҡһыҙлығы **3.** өлгөрөп етмәгәнлек; **невы́держанность вина́** шараптың өлгөрөп етмәгәнлеге

**НЕВЫ́ДЕРЖАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тотороҡһоҙ, эҙмә-эҙлекһеҙ; **невы́держанный стиль** эҙмә-эҙлекһеҙ стиль **2.** тотанаҡһыҙ, сабырһыҙ, сыҙамһыҙ; **невы́держанный челове́к** тотанаҡһыҙ кеше **3.** өлгөрөп (булып) етмәгән; **невы́держанное вино́** өлгөрөп етмәгән шарап

**НЕВЫ́ЕЗД** *м* сығып китмәү (*гәҙиттә, мәжбүри рәүештә*); **дать подпи́ску о невы́езде** сығып китмәү тураһында ҡултамға биреү

**НЕВЫНОСИ́МЫЙ,** -ая, -ое түҙә (сыҙай) алмаҫлыҡ, түҙеп (сыҙап) торғоһоҙ (булғыһыҙ), сыҙағыһыҙ; **невыноси́мая боль** түҙә алмаҫлыҡ һыҙлау (әрнеү); **невыноси́мый хара́ктер** сыҙап булғыһыҙ холоҡло (кеше)

**НЕВЫПОЛНЕ́НИЕ** *с* үтәмәү, үтәлмәү, башҡарылмау; **невыполне́ние пла́на** планды үтәмәү, пландың үтәлмәүе

**НЕВЫПОЛНИ́МЫЙ,** -ая, -ое үтәй алмаҫлыҡ, үтәлгеһеҙ; **невыполни́мое усло́вие** үтәй алмаҫлыҡ шарт

**НЕВЫРАЗИ́МЫЙ,** -ая, -ое әйтеп (һөйләп, аңлатып) биргеһеҙ (бөтөргөһөҙ); **невырази́мая красота́** һөйләп бөтөргөһөҙ гүзәллек

**НЕВЫРАЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тәьҫирһеҙ, тасуири булмаған, күркһеҙ, асыҡ (матур) булмаған; **невырази́тельная вне́шность** күркһеҙ ҡиәфәт; **невырази́тельное чте́ние** тасуири (матур итеп) уҡымау

**НЕВЫСО́КИЙ,** -ая, -ое **1.** (*низкий*) тәпәш, тәпәш, тәбәнәк, бейек булмаған; **невысо́кий забо́р** тәпәш ҡойма **2.** (*о силе, количестве и т.п.*) түбән, юғары түгел; **за́работная пла́та невысо́кая** эш хаҡы түбән **3.** (*о качестве чего-л.*) түбән, насар; **това́р невысо́кого ка́чества** түбән сифатлы тауар; **быть невысо́кого мне́ния** *о ком-чём-л.* насар фекерҙә булыу **4.** (*о должности, чине и т.п.*) түбән, бәләкәй; **невысо́кая до́лжность** бәләкәй вазифа **5.** (*о звуке, голосе и*

*т.п.*) түбән, ҡалын; **невысо́кий грудно́й го́лос** ҡалын күкрәк тауышы

**НЕВЫ́ХОД** *м* **1.** (*неявка на работу, службу и т.п.*) сыҡмау; **невы́ход на рабо́ту** эшкә сыҡмау **2.** (*о печатном издании*) (баҫылып) сыҡмау; **невы́ход после́днего но́мера журна́ла** журналдың һуңғы һанының баҫылып сыҡмауы

**НЕ́ГА** *ж* **1.** (*полное довольство*) рәхәт (иркен, мул, ғәмһеҙ) тормош; **жить в не́ге** рәхәт тормошта йәшәү **2.** (*блаженство, наслаждение*) рәхәтлек, ләззәт, хозурлыҡ, ирәүәнлек; **отда́ться не́ге** рәхәтлеккә бирелеү **3.** (*нежность*) наҙ, иркәлек; **сказа́ть с не́гой** иркәләп әйтеү

**НЕГА́ДАННО** *нареч.*; *разг.* көтмәгәндә; **прийти́ нега́данно** көтмәгәндә килеү

**НЕГА́ДАННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* көтөлмәгән; **нега́данный слу́чай** көтөлмәгән хәл

**НЕГАСИ́МЫЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт.*, *в разн. знач.* (*неугасающий*) һүнмәҫ, һүрелмәҫ, мәңге бөтмәҫ; **негаси́мый ого́нь** һүнмәҫ ут; **негаси́мая любо́вь** һүнмәҫ мөхәббәт

**НЕГАТИ́В** *м*; *фото.* негатив; **прояви́ть негати́в** негативты асыҡландырыу

**НЕГАТИВИ́ЗМ** *м* негативизм (*ниҙе лә булһа етерлек дәрәжәлә нигеҙләмәү йәки бөтөнләй инҡар итеү*)

**НЕГАТИ́ВНЫЙ I,** -ая, -ое негатив, негатив ...ы; **негати́вная плёнка** негатив плёнка

**НЕГАТИ́ВНЫЙ II,** -ая, -ое *книжн.* кире, тиҫкәре; **негати́вный отве́т** кире яуап

**НЕГАШЁНЫЙ: негашёная и́звесть** һүндерелмәгән (һыуға иҙелмәгән) әзбиз

**НЕ́ГДЕ** *нареч.* урын юҡ (булмау); **отдохну́ть не́где** ял итергә урын юҡ; **не́где взять воды́** һыу алыр урын юҡ

**НЕГИ́БКИЙ,** -ая, -ое **1.** бөгөлөп-һығылып торманған, бөгөлмәй торған, бөгөлмәүсән, һығылмалы булмаған; **неги́бкие ве́тки** бөгөлмәй торған ботаҡтар **2.** *перен.* етеҙ (зирәк, таһыллы) булмаған; **неги́бкий организа́тор** таһыллы булмаған ойоштороусы

**НЕГЛА́СНЫЙ,** -ая, -ое йәшерен; **быть под негла́сным надзо́ром** йәшерен күҙәтеү аҫтында булыу

**НЕГЛУБО́КИЙ,** -ая, -ое **1.** *в разн. знач.* (артыҡ) тәрән булмаған, һай; **неглубо́кая я́ма** һай соҡор; **неглубо́кие зна́ния** һай белем; **неглубо́кие чу́вства** тәрән булмаған хистәр **2.** һаҡ, һиҙгер; **неглубо́кий сон** һиҙгер йоҡо

**НЕГЛУ́ПЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡыллы (ғына), аҡылһыҙ (башһыҙ) түгел; **неглу́пый челове́к** аҡыллы кеше **2.** төплө (генә); **неглу́пая мысль** төплө генә фекер

**НЕГО́ДНИК** *м* и **НЕГО́ДНИЦА** *ж*; *разг.* һәләтһеҙ, эшкинмәгән, йүнһеҙ

**НЕГО́ДНОСТЬ** *ж* яраҡһыҙ(лыҡ), эшкинмәгәнлек; **прийти́ в него́дность** яраҡһыҙ хәлгә килеү; **привести́ в него́дность** яраҡһыҙ хәлгә килтереү

**НЕГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яраҡһыҙ; **него́дный прое́кт** яраҡһыҙ проект **2.** *разг.* йүнһеҙ, эшкинмәгән; **него́дный челове́к** эшкинмәгән кеше

**НЕГОДОВА́НИЕ** *с* тәрән асыу, ярһыу, ризаһыҙлыҡ, нәфрәт; **побледне́ть от негодова́ния** ярһыуҙан ағарыныу; **вы́разить негодова́ние** нәфрәт белдереү

**НЕГОДОВА́ТЬ** *несов.* (бик) ныҡ асыуланыу, нәфрәтләнеү, (тәрән) ризаһыҙлыҡ белдереү; **негодова́ть, ви́дя несправедли́вость** ғәҙелһеҙлек күреп, нәфрәтләнеү

**НЕГОДУ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **негодова́ть 2.** *прил.* асыулы, нәфрәтле; **негоду́ющий взгля́д** нәфрәтле ҡараш

**НЕГОДЯ́Й** *м* и **НЕГОДЯ́ЙКА** *ж* ҡәбәхәт, бәдбәхет, әшәке

**НЕГРА́МОТНОСТЬ** *ж* **1.** белемһеҙлек, наҙанлыҡ; **ликвида́ция негра́мотности** наҙанлыҡты бөтөрөү **2.** белемһеҙлек, аҙ белемле булыу; **негра́мотность инжене́ра** инженерҙың аҙ белемле булыуы **3.** грамотаһыҙлыҡ, хаталыҡ, хаталы булыу; **негра́мотность письма́** хаттың грамотаһыҙлығы; **негра́мотность чертежа́** һыҙманың хаталы булыуы

**НЕГРА́МОТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҡый-яҙа белмәгән, белемһеҙ, наҙан; **негра́мотный челове́к** наҙан кеше **2.** (*не обладающий нужными знаниями*) аҙ белемле, белемһеҙ, наҙан; **негра́мотный проектиро́вщик** аҙ белемле проектсы **3.** (*безграмотный*) хатаһы күп булған, күп хаталы, наҙан; **негра́мотная за́пись** күп хаталы яҙыу

**НЕГРИТЁНОК** *м* негр балаһы

**НЕГРИТЯ́НСКИЙ,** -ая, -ое негр(ҙар) ...ы; **негритя́нские пе́сни** негрҙар йыры

**НЕГРО́МКИЙ,** -ая, -ое аҡрын, ҡаты (көслө, яңғырауыҡлы) булмаған; **негро́мкий го́лос** аҡрын тауыш

**НЕ́ГРЫ** *мн.* негрҙар // *ед.* **негр** *м* негр ир-аты; **негритя́нка** *ж* негр ҡатын-ҡыҙы

**НЕГУСТО́Й,** -ая, -ое **1.** һирәк, йоҡа, ҡуйы булмаған; **негусто́й лес** һирәк урман; **негусты́е во́лосы** йоҡа сәс **2.** шыйыҡ; **негусто́й мёд** шыйыҡ бал

**НЕДА́ВНИЙ,** -яя, -ее яңыраҡ (күптән түгел генә, яҡын арала) булған, яҡын аралағы; **неда́внее собы́тие** яңыраҡ булған ваҡиға; **неда́вний студе́нт** күптән түгел генә студент булған (кеше)

**НЕДА́ВНО** *нареч.* яңы ғына, яңыраҡ ҡына, күптән түгел (генә); **неда́вно со́бранные я́годы** яңы ғына йыйылған еләктәр

**НЕДАЛЁКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*о расстоянии*) яҡын, яҡындағы, алыҫ булмаған; **недалёкое расстоя́ние** яҡын ара **2.** (*о времени*) күптән түгел генә булған, яңыраҡ булған, тиҙ (яҡын) арала буласаҡ; **в недалёком про́шлом** күптән түгел генә; **в недалёком бу́дущем** яҡын арала буласаҡ **3.** *разг.* (*о родстве*) яҡын; **недалёкие ро́дственники** яҡын ҡәрҙәштәр **4.** *перен.* (*об уме*) аҡылға

һайыраҡ (бер төрлөрәк); **недалёкий челове́к** аҡылға һайыраҡ кеше ♦ **недалёкого ума́** *кто* аҡылға һай кеше

**НЕДАЛЕКО́** и **НЕДАЛЁКО 1.** *нареч.* яҡын, яҡында ғына, алыҫ булмаған (түгел); **дере́вня нахо́дится недалеко́** ауыл яҡында ғына **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* алыҫ (йыраҡ) түгел; **до ле́са недалеко́** урманға йыраҡ түгел **3.** *в знач. сказ.*, *безл.* (*о времени*) оҙаҡ (күп) ҡалманы, оҙаҡ (күп) түгел; **до ле́та недалеко́** йәйгә күп ҡалманы ♦ **недалеко́ ходи́ть (идти́) за приме́ром** миҫал килтереүе бик еңел

**НЕДАЛЁКОСТЬ** *ж* һай аҡыллылыҡ, һай аҡыллы булыу, аҡылға бер төрлөрәк булыу; **недалёкость видна́ на его́ лице́** аҡылға бер төрлөрәк булыуы уның йөҙөнә сыҡҡан

**НЕДАЛЬНОВИ́ДНОСТЬ** *ж* алдан күрмәү(селек), алдан күрә белмәү (алмау); **отлича́ться недальнови́дностью** алдан күрә белмәү менән айырылып тороу

**НЕДАЛЬНОВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое алдан күрмәүсән (күрә белмәүсән); **недальнови́дный челове́к** алдан күрә белмәүсән кеше

**НЕДА́РОМ** *нареч.* юҡҡа (бушҡа, тиккә) ғына түгел (булмау, килмәү); **он неда́ром прие́хал** ул тиккә генә килмәгән

**НЕДВИ́ЖИМО** и **НЕДВИЖИ́МО** *нареч.* хәрәкәтһеҙ, һелкенмәй, ҡуҙғалмай; **дере́вья стоя́т недви́жимо** ағастар хәрәкәтһеҙ ҡалған

**НЕДВИ́ЖИМОСТЬ** *ж*; *юр.* күсмәй торған (күсемһеҙ) милек; **купи́ть недви́жимость** күсемһеҙ милек һатып алыу

**НЕДВИ́ЖИМЫЙ** и **НЕДВИЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое хәрәкәтһеҙ; **остава́ться недви́жимым** хәрәкәтһеҙ ҡалыу ♦ **недви́жимое иму́щество** күсемһеҙ милек

**НЕДВИ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **неподви́жный**

**НЕДВУСМЫ́СЛЕННОСТЬ** *ж* ике төрлө булмаған (аңлашылмай торған), аңлашылған, асыҡ (тура) булыу; **недвусмы́сленность отве́та** яуаптың асыҡ булыуы

**НЕДВУСМЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое ике төрлө булмаған (аңлашылмай торған), асыҡ, тура; **недвусмы́сленный вопро́с** тура һорау

**НЕДЕЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* **1.** *книжн.* эшкә һәләтһеҙлек (яраҡһыҙлыҡ) **2.** *юр.* юридик яҡтан хоҡуғы булмаған (хоҡуҡһыҙлыҡ); **недееспосо́бность несовершеннолé тних** балиғ булмағандарҙың юридик яҡтан хоҡуҡһыҙлығы

**НЕДЕЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* эшкә һәләтһеҙ (яраҡһыҙ); **недееспосо́бная организа́ция** эшкә һәләтһеҙ ойошма **2.** *юр.* юридик яҡтан хоҡуҡһыҙ, хоҡуғы юҡ (булмау); **недееспосо́бная ли́чность** юридик яҡтан хоҡуҡһыҙ шәхес

**НЕДЕЙСТВИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ғәмәлдән сыҡҡан булыу, яраҡһыҙлыҡ, көсө бөткән (кәрәге ҡалмаған) булыу, уйҙырма; **недействи́тельность докуме́нта** документтың яраҡһыҙлығы

**НЕДЕЙСТВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ғәмәлдән сыҡҡан, көсө бөткән, яраҡһыҙ; **биле́т недействи́телен** билет ғәмәлдән сыҡҡан **2.** ысын булмаған, уйҙырма, ялған; **недействи́тельное сообще́ние** уйҙырма хәбәр

**НЕДЕЛИКА́ТНОСТЬ** *ж* тупаҫлыҡ, нәзәкәтһеҙлек, әҙәпһеҙлек; **прояви́ть неделика́тность** тупаҫлыҡ күрһәтеү

**НЕДЕЛИКА́ТНЫЙ,** -ая, -ое нәзәкәтһеҙ, тупаҫ, әҙәпһеҙ; **неделика́тный челове́к** әҙәпһеҙ кеше; **неделика́тный вопро́с** тупаҫ һорау

**НЕДЕЛИ́МОСТЬ** *ж* **1.** бүленмәй торған (бүленмәҫ) булыу; **недели́мость иму́щества** мөлкәттең бүленмәҫ булыуы **2.** *мат.* ҡалдыҡһыҙ бүленмәүсәнлек; **недели́мость чи́сел** һандарҙың ҡалдыҡһыҙ бүленмәүсәнлеге

**НЕДЕЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** бүленмәй торған, бүленмәҫкә тейешле; **недели́мый фонд** бүленмәй торған фонд **2.** *перен.* бер бөтөн, тотош; **недели́мое це́лое** бер бөтөн **3.** *мат.* ҡалдыҡһыҙ бүленмәй торған; **недели́мое число́** ҡалдыҡһыҙ бүленмәй торған һан

**НЕДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аҙна, бер аҙналыҡ, (бер) аҙнаға иҫәпләнгән; **неде́льный срок** бер аҙналыҡ срок

**НЕДЕ́ЛЯ** *ж* аҙна, аҙналыҡ; **уе́хать на неде́лю** бер аҙнаға китеү; **раз в неде́лю** аҙнаға бер тапҡыр; **Неде́ля де́тской кни́ги** Балалар китабы аҙналығы

**НЕДЕ́ЛЯМИ** *нареч.* аҙналап, аҙналар буйы(на); **неде́лями боле́ть** аҙналар буйы ауырыу

**НЕДЕРЖА́НИЕ: недержа́ние мочи́** *мед.* бәүел тота алмау, бойлоҡһоҙ булыу, энурез (*ауырыу*)

**НЕДИСЦИПЛИНИ́РОВАННОСТЬ** *ж* тәртипһеҙлек; **прояви́ть недисциплини́рованность** тәртипһеҙлек күрһәтеү

**НЕДИСЦИПЛИНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое тәртипһеҙ; **недисциплини́рованный учени́к** тәртипһеҙ уҡыусы

**НЕДО...** *приставка*; *эш-хәрәкәттең йәки сифаттың тулы булмағанлығын белдерә*, *мәҫ*., **недогляде́ть** күреп (ҡарап) еткермәү; **недора́звитый** үҫеп етмәгән

**НЕДОБИРА́ТЬ** *несов. см.* **недобра́ть**

**НЕДОБИРА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **недобира́ть**

**НЕДОБО́Р** *м* йыйып еткермәү, алып еткермәү, йыйып (алып) еткерелмәгән; **недобо́р студе́нтов в учебно́е заведе́ние** уҡыу йортона студенттарҙы (тейешле һанда) алып еткермәү

**НЕДОБРА́ТЬ** *сов. что*, *кого-чего* йыйып (алып) еткермәү, кәм йыйыу (алыу), кәм йыйып алыу; **недобра́ть урожа́й** уңышты кәм йыйып алыу

**НЕДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬ** *м* и **НЕДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* дошман, уҫаллыҡ (яуызлыҡ) теләүсе, хаслыҡ ҡылыусы

**НЕДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* уҫал (яуыз) теләктә булыу, дошман күреү, хаслыҡ уйлау; **недоброжела́тельность к окружа́ющим** эргә-тирәләге кешеләрҙе дошман күреү

**НЕДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҫал уйлы, дошман күреүсе, уҫал (насар, яман, яуыз) ниәтле, хаслыҡ (хөсөт) уйлаусы; **недоброжела́тельный челове́к** уҫал уйлы кеше **2.** уҫал, насар, дошмандарса, дошманға хас; **недоброжела́тельный взгляд** уҫал ҡараш; **недоброжела́тельное отноше́ние** насар мөнәсәбәт

**НЕДОБРОЖЕЛА́ТЕЛЬСТВО** *с* уҫаллыҡ (яуызлыҡ) теләү, дошман күреү, насар ниәттә (яуыз уйҙа) булыу; **посмотре́ть с недоброжела́тельством** дошман күреп ҡарау

**НЕДОБРОКА́ЧЕСТВЕННОСТЬ** *ж* насар (түбән) сифатлылыҡ, боҙоҡлоҡ, яраҡһыҙлыҡ; **недоброка́чественность това́ров** тауарҙарҙың түбән сифатлылығы

**НЕДОБРОКА́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое насар (түбән) сифатлы, яраҡһыҙ, боҙоҡ; **недоброка́чественные проду́кты** боҙоҡ аҙыҡ-түлек; **недоброка́чественная рабо́та** насар сифатлы эш

**НЕДОБРОСО́ВЕСТНОСТЬ** *ж* намыҫһыҙлыҡ, выжданһыҙлыҡ; **проявля́ть недобросо́вестность** намыҫһыҙлыҡ күрһәтеү

**НЕДОБРОСО́ВЕСТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** намыҫһыҙ, выжданһыҙ; **недобросо́вестный челове́к** намыҫһыҙ кеше; **недобросо́вестный посту́пок** намыҫһыҙ (оятһыҙ) ҡыланыш **2.** (*небрежный*) насар (иғтибарһыҙ, арлы-бирле, намыҫһыҙ) эшләнгән; **недобросо́вестная рабо́та** насар эшләнгән эш

**НЕДО́БРЫЙ,** -ая, -ое **1.** яуыз, уҫал, яһил, мәрхәмәтһеҙ; **недо́брый челове́к** яуыз кеше; **недо́брый взгляд** уҫал ҡараш **2.** яман, насар; **недо́брая молва́** насар хәбәр; **оста́вить о себе́ недо́брую па́мять** үҙең тураһында насар иҫтәлек ҡалдырыу **3.** күңелһеҙ, насар, хәйерһеҙ; **недо́брая весть** күңелһеҙ хәбәр; **в недо́брый час** хәйерһеҙ сәғәттә **4.** дошманлыҡ ...ы; **недо́брые чу́вства** дошманлыҡ хисе **5.** *в знач. сущ.* **недо́брое** *с* насарлыҡ, яманлыҡ, уҫал ниәт; **замышля́ть недо́брое** уҫаллыҡ уйлау ♦ **недо́брой па́мяти** *кто-что* күңелһеҙ иҫтәлекле

**НЕДОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **недовари́ть**

**НЕДОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **недовари́ться 2.** *страд. от* **недова́ривать**

**НЕДОВАРИ́ТЬ** *сов. что* бешереп еткермәү; **недовари́ть суп** ашты бешереп еткермәү

**НЕДОВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* бешеп етмәү; **ка́ша недовари́лась** бутҡа бешеп етмәгән

**НЕДОВЕ́РИЕ** *с* ышанмау, ышанмаусанлыҡ, шик, шикләнеү; **вы́разить недове́рие** ышанмаусанлыҡ белдереү; **пита́ть недове́рие** ышанмау

**НЕДОВЕ́РЧИВОСТЬ** *ж* ышанмаусанлыҡ, шикләнеү(сәнлек), шик

**НЕДОВЕ́РЧИВЫЙ,** -ая, -ое ышанмаусан, шиксел, шикләнеүсән; **недове́рчивый челове́к** ышанмаусан кеше; **бро́сить недове́рчивый взгляд** шиксел ҡараш ташлау

**НЕДОВЕ́С** *м* **1.** *см.* **недове́сить** — **недове́шивать 2.** үлсәүе етмәү, кәм үлсәнеү; **обнару́жить недове́с** кәм үлсәнеүен белеү

**НЕДОВЕ́СИТЬ** *сов. что, чего* үлсәп еткермәү, еткереп үлсәмәү, кәм үлсәү; **недове́сить са́хара** шәкәрҙе үлсәп еткермәү

**НЕДОВЕ́СОК** *м*; *разг.* **1.** кәм үлсәүле (үлсәүе етмәгән) нәмә; **бу́лка-недове́сок** кәм үлсәүле күмәс **2.** *см.* **недове́с**

**НЕДОВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **недове́сить**

**НЕДОВЕ́ШИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **недове́шивать**

**НЕДОВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ризаһыҙ, көнәркәш, ҡәнәғәтһеҙ, ҡәнәғәтһеҙлекте (ризаһыҙлыкты) белдергән, ҡәнәғәт түгел; **недово́льный челове́к** ҡәнәғәтһеҙ кеше; **недово́льный взгляд** ризаһыҙ ҡараш

**НЕДОВО́ЛЬСТВО** *с* ризаһыҙлыҡ, көнәркәшлек, ҡәнәғәтһеҙлек, ҡәнәғәт булмау; **вы́разить недово́льство** ризаһыҙлыҡ белдереү; **вы́звать недово́льство** ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырыу; **недово́льство собо́й** үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәт булмау

**НЕДОВЫПОЛНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **недовы́полнить 2.** үтәлеп етмәгән (үтәлмәй ҡалған) өлөш, үтәлмәгән өлөш; **недовыполне́ние пла́на** пландың үтәлмәгән өлөшө

**НЕДОВЫ́ПОЛНИТЬ** *сов.* үтәп (эшләп, тултырып) еткермәү; **недовы́полнить план** планды үтәп еткермәү

**НЕДОВЫПОЛНЯ́ТЬ** *несов. см.* **недовы́полнить**

**НЕДОВЫПОЛНЯ́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **недовыполня́ть**

**НЕДОГА́ДЛИВОСТЬ** *ж* һиҙгер (отҡор, зирәк) булмау, аңралыҡ, мәшәүлек, маҡаулыҡ; **недога́дливость в мелоча́х жи́зни** тормоштоң ваҡ-төйәк мәсьәләләрендә һиҙгер булмау

**НЕДОГА́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое һиҙгер (отҡор, зирәк) булмаған, аңыш, мәшәү, аңра, маҡау; **недога́дливый ребёнок** аңыш бала

**НЕДОГЛЯДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* и *без доп.* күрмәй үткәреп ебәреү, күрмәй ҡалдырыу, күреп еткермәү; **недогляде́ть оши́бки** хаталарҙы күрмәй ҡалдырыу **2.** *за кем-чем* күреп (ҡарап) еткермәү; **недогляде́ть за ребёнком** баланы (яҡшылап) ҡарап еткермәү

**НЕДОГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **недоговори́ть**

**НЕДОГОВОРЁННОСТЬ** *ж* **1.** (*несогласованность*) үҙ-ара алдан һөйләшеп (килешеп) ҡуйылмағанлыҡ, алдан һөйләшеп (килешеп) ҡуймау; **недоговорённость меша́ет в рабо́те** алдан һөйләшеп ҡуймау эштә ҡамасаулай **2.** (*недосказанность*) (асыҡ итеп) әйтеп еткермәү

(бөтөрмәү), әйтеп еткермәгәнлек; **чу́вствуется недоговорённость в его́ слова́х** уның һүҙҙәрендә әйтеп еткермәгәнлек һиҙелә

**НЕДОГОВОРИ́ТЬ** *сов. что, чего* и *без доп.* (тулыһынса) әйтеп еткермәү, әйтеп (һөйләп) бөтөрмәү, асыҡ итеп әйтмәү

**НЕДОГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **недогрузи́ть**

**НЕДОГРУ́З** *м* **1.** *см.* **недогрузи́ть — недогружа́ть 2.** (*недогруженное количество чего-л.*) тейәп еткерелмәгән өлөш (йөк); **недогру́з составля́ет две то́нны** тейәп еткерелмәгән йөк ике тонна тәшкил итә

**НЕДОГРУЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* тейәп еткермәү; **недогрузи́ть ваго́ны** вагондарҙы тейәп еткермәү **2.** *кого-что*; *перен., разг.* (*не обеспечить работой в полной мере*) тулы көсөнә эшләтмәү, тулыһынса эш менән тәьмин итмәү; **недогрузи́ть предприя́тие** предприятиены эш менән тулһынса тәьмин итмәү

**НЕДОДЕ́ЛАТЬ** *сов. что* эшләп еткермәү (бөтөрмәү); **недоде́лать заду́манное** уйланған эште эшләп бөтөрмәү

**НЕДОДЕ́ЛКА** *ж*; *разг.* эшләнеп етмәү (бөтмәү), эшләп еткермәү (еткерелмәү), кәмселек, эшләнеп бөтмәгән урын; **в но́вом до́ме мно́го недоде́лок** яңы йорттоң эшләнеп бөтмәгән урындары күп

**НЕДОДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **недоде́лать**

**НЕДОДЕРЖА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*продержать меньше*) кәм (әҙ) тотоу; **недодержа́ть термо́метр** термометрҙы әҙ тотоу **2.** *фото., тех.* әҙ тотоу, тотоп еткермәү (*эшкәрткәндә*)

**НЕДОДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **недодержа́ть**

**НЕДОЕДА́НИЕ** *с см.* **недоеда́ть** 2

**НЕДОЕДА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **недое́сть 2.** аслы-туҡлы йәшәү; **недоеда́ть до́лгое вре́мя** оҙаҡ ваҡыт аслы-туҡлы йәшәү

**НЕДОЕ́СТЬ** *сов.* туйғансы ашамау, әҙ ашау; **недое́сть за обе́дом** төшкө ашты туйғансы ашамау

**НЕДОЗВО́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое тыйылған, рөхсәт ителмәгән, ярамаған; **недозво́ленный приём** тыйылған ысул

**НЕДОЗРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* өлгөрмәгән, етлекмәгән, бешмәгән; **недозре́лое я́блоко** өлгөрмәгән алма; **недозре́лый ум** етлекмәгән аҡыл

**НЕДОИ́МКА** *ж*; *ист.* недоимка (*һалымдың ваҡытында түләнмәй ҡалған өлөшө*)

**НЕДОИ́МЩИК** *м*; *ист.* недоимщик (*һалымды ваҡытында түләп бөтөрмәүсе*)

**НЕДОКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ышандырғыһыҙ, ышандырырлыҡ булмаған, ышандыра алмаҫлыҡ; **недоказа́тельный до́вод** ышандырырлыҡ булмаған дәлил

**НЕДОКАЗУ́ЕМОСТЬ** *ж* иҫбат итмәҫлек (ителмәҫлек) булыу; **недоказу́емость вины́** ғәйептең иҫбат ителмәҫлек булыуы

**НЕДОКАЗУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое иҫбат итмәҫлек (ителмәҫлек); **недоказу́емая гипо́теза** иҫбат ителмәҫлек гипотеза

**НЕДОКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **недокорми́ть**

**НЕДОКА́РМЛИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **недока́рмливать**

**НЕДОКО́РМ** *м* кәрәгенсә (туйғансы, туя) ашатмау, әҙ ашатыу; **недоко́рм скота́** малды кәрәгенсә ашатмау

**НЕДОКОРМИ́ТЬ** *сов. кого-что* кәрәгенсә (туйғансы, туя) ашатмау, әҙ ашатыу; **недокорми́ть ло́шадь** атты туйғансы ашатмау

**НЕДОЛГА́: (вот) и вся недолга́** (была) ошонон менән эш тә бөттө, шул ғына

**НЕДО́ЛГИЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа (аҙ) ғына, бер аҙ, оҙаҡҡа һуҙылмаған; **недо́лгое вре́мя** аҙ (ғына) ваҡыт; **по́сле недо́лгих размышле́ний** бер аҙ уйланғандан һуң

**НЕДО́ЛГО 1.** *нареч.* оҙаҡ (күп) -май(ынса)/-мәй(енсә), ҡыҫҡа ваҡыт, тиҙ; **недо́лго ду́мая** күп уйлап тормайынса **2.** *в знач. сказ.*; *разг.* (*легко*) еңел, еп-еңел, (ап-)анһат, бик тиҙ, оҙаҡ (ҡыйын) түгел; **и утону́ть недо́лго** батып ҡуйыуың да ап-анһат ♦ **недо́лго и до греха́ (до беды́)** күңелһеҙ хәл (ҡайғы-хәсрәт) килеп тыуыуы ла оҙаҡ түгел

**НЕДОЛГОВЕ́ЧНОСТЬ** *ж* ныҡ булмау, тиҙ туҙыу, ҡыҫҡа ғүмерле булыу; **недолгове́чность о́буви** аяҡ кейеменең тиҙ туҙыуы; **недолгове́чность жи́зни** ғүмерҙең ҡыҫҡа булыуы

**НЕДОЛГОВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*непрочный*) тиҙ туҙа торған, ныҡ булмаған; **недолгове́чная постро́йка** ныҡ булмаған ҡаралты **2.** ҡыҫҡа, оҙаҡҡа һуҙылмай торған, ҡыҫҡа ғүмерле, оҙаҡ йәшәмәй торған; **недолгове́чное сча́стье** ҡыҫҡа ғүмерле бәхет; **недолгове́чное расте́ние** ҡыҫҡа ғүмерле үҫемлек

**НЕДОЛГОВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡыҫҡа ваҡытлы, оҙаҡҡа һуҙылмаған, оҙаҡҡа һуҙылмай торған; **недолговре́менная вое́нная слу́жба** оҙаҡҡа һуҙылмаған хәрби хеҙмәт

**НЕДОЛЁТ** *м* (осоп) барып етмәй (етә алмай) ергә төшөү (*таш, уҡ, пуля, снаряд һ.б.*); **недолёт снаря́да** снарядтың осоп барып етмәй (ергә) төшөүе

**НЕДОЛИ́В** *м* **1.** *см.* **недоли́ть — недолива́ть 2.** һалып (ҡойоп) еткерелмәгән өлөш; **недоли́в бензи́на** ҡойоп еткерелмәгән бензин

**НЕДОЛИВА́НИЕ** *с см.* **недолива́ть**

**НЕДОЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **недоли́ть**

**НЕДОЛИ́ТЬ** *сов. что* тултырмай һалыу (ҡойоу); **недоли́ть воды́ в ча́йник** сәйнүккә һыуҙы тултырмай һалыу

**НЕДОЛЮ́БЛИВАТЬ** *несов. кого-что* яратып бөтөрмәү (етмәү, етеңкерәмәү), һөйһөнмәү

**НЕДОМЕ́РИВАТЬ** *несов. см.* **недоме́рить**

**НЕДОМЕ́РИТЬ** *сов. что* үлсәп еткермәү, кәм үлсәү; **недоме́рить полме́тра шёлка** ярты метр ебәк(те) кәм үлсәү

**НЕДОМЕ́РОК** *м* үлсәме (күләме) кәм булған нәмә, үлсәме тура килмәгән (нормаль булмаған) нәмә

**НЕДОМЕ́РЯТЬ** *сов.*; *разг. см.* **недоме́рить**

**НЕДОМОГА́НИЕ** *с* ауырыкһыныу, хәлһеҙлек, кәйеф китеп тороу, бер аҙ хәлһеҙләнеп (ауырып) тороу; **испы́тывать недомога́ние** бер аҙ ауырып тороу

**НЕДОМОГА́ТЬ** *несов.* ауырыкһыныу, хәлһеҙлек һиҙеү, ауырып тороу; **недомога́ть от головно́й бо́ли** баш ауыртып тороу

**НЕДОМО́ЛВКА** *ж* әйтеп еткерелмәгән (бөтөрмәгән) һүҙ (фекер, уй), әйтелеп бөтмәү, әйтеп бөтөрмәү; **говори́ть недомо́лвками** әйтеп бөтөрмәй һөйләү

**НЕДОМЫ́СЛИЕ** *с* уйлап еткермәү; **соверши́ть глу́пость по недомы́слию** уйлап еткермәү арҡаһында ахмаҡлыҡ эшләп ташлау

**НЕДОНО́СОК** *м* етлекмәй тыуған (етлекмәгән) бала; **роди́ть недоно́ска** етлекмәгән бала табыу

**НЕДОНО́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое етлекмәй тыуған; **недоно́шенный ребёнок** етлекмәй тыуған бала

**НЕДООЦЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **недооцени́ть**

**НЕДООЦЕ́НИВАТЬСЯ** *несов. страд. от* **недооце́нивать**

**НЕДООЦЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что* баһа биреп еткермәү, баһалап еткермәү; **недооцени́ть си́лы сопе́рника** ярышташтың көсөн баһалап еткермәү

**НЕДООЦЕ́НКА** *ж см.* **недооцени́ть**

**НЕДОПЕКА́ТЬ** *несов. см.* **недопе́чь**

**НЕДОПЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **недопе́чься** **2.** *страд. от* **недопека́ть**

**НЕДОПЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что* (*не пропечь*) бешереп еткермәү; **недопе́чь пиро́г** бәлеште бешереп еткермәү **2.** *что* (*испечь меньше, чем нужно*) кәрәгенән әҙ (кәм) бешереү, етерлек бешермәү

**НЕДОПЕ́ЧЬСЯ** *сов.* (*не пропечься*) бешеп етмәү; **пиро́г недопёкся** бәлеш бешеп етмәгән

**НЕДОПЛА́ТА** *ж* **1.** *см.* **недоплати́ть – недопла́чивать** **2.** түләнеп бөтмәй ҡалған сумма (аҡса); **недопла́та за кварти́ру** фатир өсөн түләнеп бөтмәй ҡалған аҡса

**НЕДОПЛАТИ́ТЬ** *сов. что* түләп еткермәү (бөтөрмәү); **недоплати́ть три рубля́** өс һум түләп еткермәү

**НЕДОПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **недоплати́ть**

**НЕДОПОЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **недополучи́ть**

**НЕДОПОЛУЧА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **недополуча́ть**

**НЕДОПОЛУЧИ́ТЬ** *сов. что, чего* алып бөтөрмәү, кәм алыу; **недополучи́ть де́сять рубле́й** ун һумға кәм алыу

**НЕДОПОНИМА́НИЕ** *с*; *разг.* аңлап еткермәү (бөтөрмәү); **недопонима́ние свои́х зада́ч** үҙ бурыстарыңды аңлап еткермәү

**НЕДОПОНИМА́ТЬ** *несов. см.* **недопоня́ть**

**НЕДОПОНЯ́ТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* аңлап еткермәү (бөтөрмәү); **недопоня́ть его́ мы́сли** уның уй(ҙар)ын аңлап еткермәү

**НЕДОПУСТИ́МОСТЬ** *ж* ярамағанлыҡ, тыйылғанлыҡ; **недопусти́мость теле́сных нака-за́ний** тән язалауҙарының тыйылғанлығы

**НЕДОПУСТИ́МЫЙ,** -ая, -ое ярамаған, ярамай торған, тыйылған, юл ҡуймаҫлыҡ; **недопусти́мый посту́пок** ярамаған ҡылыҡ

**НЕДОРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **недорабо́тать**

**НЕДОРАБО́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **недорабо́тать** **2.** *прил.* (тейешенсә) эшләнеп бөтмәгән (еткерелмәгән), кәмселекле; **недорабо́танная пье́са** эшләнеп еткерелмәгән пьеса

**НЕДОРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* кәрәгенән кәм (әҙ) эшләү **2.** (тейешенсә) эшләп еткермәү, насар эшләү; **недорабо́тать свой срок** тейешле ваҡытына эшләп еткермәү; **недорабо́тать прое́кт** проектты тейешенсә эшләп еткермәү

**НЕДОРАБО́ТКА** *ж* **1.** *см.* **недорабо́тать** **2.** *разг.* (*изъян*) эшләнеп еткерелмәгән (еткерелмәй ҡалған) урын (кәмселектәр), етешһеҙлек; **ликвиди́ровать недорабо́тки** эшләнеп еткерелмәгән кәмселектәрен бөтөрөү

**НЕДОРА́ЗВИТОСТЬ** *ж* **1.** үҫеп етмәгәнлек, етлекмәгәнлек, үҫмәй ҡалғанлыҡ; **недора́звитость заро́дыша** бәбәктең етлекмәгәнлеге **2.** аҡыл яғынан артта ҡалғанлыҡ

**НЕДОРА́ЗВИТЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҫеп етмәгән, етлекмәгән; **недора́звитые листо́чки** үҫеп етмәгән япраҡтар **2.** (*умственно отсталый*) аҡыл яғынан артта ҡалған; **недора́звитый ребёнок** аҡыл яғынан артта ҡалған бала

**НЕДОРАЗУМЕ́НИЕ** *с* **1.** (*путаница, ошибка*) аңлап етмәү, аңлашылмаусанлыҡ, хата, яңылыш(лыҡ); **обвини́ть по недоразуме́нию** яңылыш ғәйепләү **2.** (*взаимное несогласие*) талаш, ыҙғыш, үҙ-ара килешмәү, ҡаршылыҡ(тар), аңлашылмаусанлыҡ; **в семье́ постоя́нные недоразуме́ния** ғаиләлә һәр ваҡыт үҙ-ара килешмәү

**НЕДОРОГО́Й,** -ая, -ое **1.** арзан, осһоҙ, ҡиммәт түгел; **недорога́я ткань** арзан туҡыма **2.** *обычно кратк. ф.*; *перен.* ҡәҙерле (аяулы, ғәзиз) түгел; **жизнь ему́ недорога́** уға тормош ҡәҙерле түгел

**НЕДОРО́Д** *м см.* **неурожа́й**

**НЕ́ДОРОСЛЬ** *м* **1.** *ист.* балиғ булмаған үҫмер (*XVIII–XIX бб. Рәсәйҙә: балиғ булмаған һәм хеҙмәт итә башламаған йәш дворян*) **2.** *разг., ирон.* һаҡаллы сабый, белемһеҙ үҫмер, тар ҡарашлы йәш кеше

**НЕДОСА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **недосоли́ть**

**НЕДОСЕ́В** *м*; *с.-х.* сәсеп еткермәү, кәм сәсеү; **недосе́в льна** етенде кәм сәсеү

**НЕДОСЕВА́ТЬ** и **НЕДОСЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **недосе́ять**

**НЕДОСЕ́ЯТЬ** *сов. что* сәсеп еткермәү, кәм сәсеү; **недосе́ять пять гекта́ров** биш гектарға кәм сәсеү

**НЕДОСКА́ЗАННОСТЬ** *ж* әйтеп еткерелмәгәнлек, әйтеп еткермәү (бөтөрмәү); **недоска́занность мы́сли** уйҙы әйтеп еткермәү

**НЕДОСКА́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **недосказа́ть 2.** *прил.* әйтеп еткерелмәгән (бөтөрөлмәгән); **недоска́занные слова́** әйтеп бөтөрөлмәгән һүҙҙәр

**НЕДОСКАЗА́ТЬ** *сов.* әйтеп бөтөрмәү (еткермәү), әйтмәй ҡалдырыу; **недосказа́ть са́мое ва́жное** иң мөһим нәмәләрҙе әйтмәй ҡалдырыу

**НЕДОСКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **недосказа́ть**

**НЕДОСЛА́ТЬ** *сов. что* ебәреп еткермәү, кәрәгенән кәм ебәреү; **недосла́ть журна́лы** журналдарҙы кәрәгенән кәм ебәреү

**НЕДОСЛЫ́ШАТЬ** *сов.* ишетеп еткермәү, ишетмәй ҡалыу; **недослы́шать после́дние слова́** һуңғы һүҙҙәрҙе ишетмәй ҡалыу

**НЕДОСМО́ТР** *м* **1.** ҡарап (күреп) еткермәү; **недосмо́тр за ребёнком** баланы ҡарап еткермәү **2.** (иғтибарһыҙ булыу сәбәпле) ебәрелгән хата, яңылыш; **недосмо́тры в но́вом изда́нии рабо́ты** эштең яңы баҫмаһында ебәрелгән хаталар

**НЕДОСМОТРЕ́ТЬ** *сов. см.* **недогляде́ть**

**НЕДОСО́Л** *м* тоҙлап еткермәү, еңел тоҙлау; **недосоли́ть суп** ашты тоҙлап еткермәү

**НЕДОСПА́ТЬ** *сов.* йоҡо туймау (ҡандырмау), туйғансы йоҡламау

**НЕДОСПЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *см.* **недозре́лый**

**НЕДОСТАВА́ТЬ** *несов. кого-чего безл.* **1.** етмәү, етешмәү; **у него́ недостава́ло терпе́ния** уның түҙемлеге етмәй ине **2.** булмау, юҡ булыу, етмәү; **недостава́ло трёх экземпля́ров кни́ги** өс дана китап етмәй ине ♦ **э́того (ещё, то́лько) недостава́ло (недостаёт)**; **(ещё) недостава́ло (недостаёт), что́бы (произошло́, случи́лось)** *что* шул ғына етмәгән (етмәй) ине

**НЕДОСТА́ТОК** *м* **1.** (*нехватка*) етмәү, еткеһеҙ булыу, етешмәү; **недоста́ток вре́мени** ваҡыт етмәү **2.** (*изъян*) етешһеҙлек, етешһеҙ яҡ, кәмселек; **у него́ есть оди́н недоста́ток** уның бер етешһеҙ яғы бар **3.** *обычно мн.* **недоста́тки**; *разг.* (*нужда*) етешһеҙлек, ҡытлыҡ, мохтажлыҡ, ҡыҫынҡылыҡ; **терпе́ть недоста́тки** мохтажлыҡ күреү ♦ **нет недоста́тка** *в ком-чём* мохтажлыҡ юҡ, етерлек

**НЕДОСТА́ТОЧНОСТЬ** *ж* **1.** етерлек булмау; **недоста́точность при́нятых мер** күрелгән сараларҙың етерлек булмауы **2.** ҡәнәғәтләндерерлек (ризалатырлыҡ) булмау; **недоста́точность отве́та** яуаптың ҡәнәғәтләндерерлек булмауы ♦ **серде́чная недоста́точность** *мед.* йөрәктең хәлһеҙлеге

**НЕДОСТА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** еткелекһеҙ, етерлек булмаған (түгел), әҙ; **недоста́точные сре́дства** етерлек булмаған аҡса; **недоста́точная по́мощь** аҙ ярҙам **2.** (*неполный, неудовлетворительный*) ҡәнәғәтләнерлек (етерлек, тулы) булмаған (түгел); **недоста́точные све́дения** тулы булмаған мәғлүмәттәр; **недоста́точное зна́ние своего́ де́ла** үҙ эшеңдә ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә белмәү

**НЕДОСТА́ТЬ** *сов. чего безл.* етмәү; **недоста́ть сме́лости** батырлыҡ (ҡыйыулыҡ) етмәү

**НЕДОСТА́ЧА** *ж*; *разг.* етмәү, етешмәү, тулмау, кәм (өҫтөнә) сығыу; **недоста́ча сельхозмаши́н** ауыл хужалығы машиналарының етешмәүе; **обнару́жить недоста́чу** етешмәүен асыҡлау (белеп ҡалыу)

**НЕДОСТАЮ́ЩИЙ,** -ая, -ее етмәгән, етешмәгән, кәм; **недостаю́щие страни́цы** етмәгән биттәр

**НЕДОСТИЖИ́МОСТЬ** *ж* (маҡсатына) ирешә алмаҫлыҡ булыу, тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ булыу; **недостижи́мость це́ли** маҡсаттың ирешә алмаҫлыҡ булыуы

**НЕДОСТИЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ирешеп булмаҫлыҡ, тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ, буй етмәҫлек; **недостижи́мая мечта́** тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ хыял **2.** барып (менеп) етә алмаҫлыҡ; **недостижи́мая высота́** менеп етә алмаҫлыҡ бейеклек

**НЕДОСТОВЕ́РНОСТЬ** *ж* дөрөҫкә тура килмәү, дөрөҫлөгө икеле булыу, дөрөҫ булмау; **недостове́рность фа́ктов** факттарҙың дөрөҫ булмауы

**НЕДОСТОВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое шикле, (дөрөҫлөгө) икеле, дөрөҫ булмаған; **недостове́рные слу́хи** шикле хәбәрҙәр

**НЕДОСТО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** лайыҡ булмаған (түгел); **недосто́йный внима́ния факт** иғтибарға лайыҡ булмаған факт **2.** (*безнравственный*) әҙәпһеҙ, түбән; **недосто́йное поведе́ние** әҙәпһеҙ ҡылыҡ

**НЕДОСТУ́ПНОСТЬ** *ж* **1.** эргәһенә (яҡын) бара (килә, етә) алмаҫлыҡ булыу, яҡын юлай алмаҫлыҡ, барып еткеһеҙ булыу; **недосту́пность го́рной верши́ны** тау түбәһенең менеп етә алмаҫлыҡ булыуы **2.** аңлауға ауыр, ҡатмарлы (ауыр) булыу, ҡырыҫ булыу; **э́та кни́га недосту́пна де́тям** был китап балалар аңлауға ауыр

**НЕДОСТУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яҡын килә алмаҫлыҡ, барып етә алмаҫлыҡ, яҡын барырлыҡ түгел (булмаған); **недосту́пное ме́сто** барып етә алмаҫлыҡ урын **2.** (*превышающий возможности*) үтә ҡиммәт; **недосту́пные це́ны** үтә ҡиммәт хаҡтар **3.** (*о человеке*) ҡырыҫ, торпа(й); **недосту́пный челове́к** ҡырыҫ кеше **4.** (*трудный для понимания*) аңлашылмаҫлыҡ, аңлай алмаҫлыҡ, ҡатмарлы

**НЕДОСУ́Г** *м*; *разг.* **1.** ваҡыт юҡлыҡ, эштең тығыҙлығы; **сосла́ться на недосу́г** ваҡыт юҡлыҡҡа һылтаныу **2.** *в знач. сказ.* ваҡыт юҡ; **ему́ недосу́г** уның ваҡыты юҡ

**НЕДОСЧИТА́ТЬСЯ** *сов.* (иҫәптә) кәм сығыу, тулмау, етмәү; **недосчита́ться мно́гих книг** күп китаптарҙың етмәүе

**НЕДОСЧИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **недосчита́ться**

**НЕДОСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **недосла́ть**

**НЕДОСЫЛА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **недосыла́ть**

**НЕДОСЫ́ЛКА** *ж см.* **недосла́ть**; **недосы́лка газе́т** гәзиттәрҙе кәм ебәреү

**НЕДОСЫ́ПАТЬ** *сов.* тултырмай һалыу, тултырғансы һалмау, кәм һалыу; **недосы́пать в мешо́к зерно́** ашлыҡты тоҡҡа тултырмай һалыу

**НЕДОСЫПА́ТЬ I** *несов. см.* **недосы́пать**

**НЕДОСЫПА́ТЬ II** *несов. см.* **недоспа́ть**

**НЕДОСЯГА́ЕМОСТЬ** *ж см.* **недостижи́мость**

**НЕДОСЯГА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *см.* **недостижи́мый**

**НЕДОТРО́ГА 1.** *м* и *ж*; *разг.* үпкәсел, һүҙ күтәрмәгән (*кеше*) **2.** *ж*; *бот.* һары ҡына

**НЕДОТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **недотяну́ть**

**НЕДОТЯНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** һуҙып (тартып) еткермәү; **недотяну́ть про́волоку** сымды һуҙып еткермәү **2.** *перен.*, *разг.* үтәп еткермәү; **недотяну́ть пяти́ проце́нтов до пла́на** планды биш процентҡа үтәп еткермәү

**НЕДОУ́ЗДОК** *м* нуҡта; **снять недоу́здок** нуҡта һалдырыу

**НЕДОУМЕВА́ТЬ** *несов.* төшөнөп (аңлап) етмәү, аңламай тороу, аптырау, аптырап (аптырашта) ҡалыу

**НЕДОУМЕ́НИЕ** *с* икеләнеү, аптырап ҡалыу, аңламай тороу; **останови́ться в недоуме́нии** аптырап туҡтап ҡалыу

**НЕДОУМЕ́ННЫЙ** и *разг.* **НЕДОУМЁННЫЙ,** -ая, -ое аптыраулы, шикләнеүле, икеләнеүле; **недоуме́нный вопро́с** аптыраулы һорау

**НЕДОУЧЕ́СТЬ** *сов. что*; *разг.* иғтибарға алып етмәү, иҫәпкә алып бөтөрмәү (еткермәү); **недоуче́сть сложи́вшиеся обстоя́тельства** килеп тыуған шарттарҙы иҫәпкә алып бөтөрмәү

**НЕДОУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **недоучи́ть**

**НЕДОУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **недоучи́ться 2.** *страд. от* **недоу́чивать**

**НЕДОУЧИ́ТЬ** *сов. кого* тулы(һынса) белем бирмәү, уҡытып еткермәү; **недоучи́ть ребёнка в шко́ле** мәктәптә балаға тулы белем бирмәү

**НЕДОУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* тулы(һынса) белем алмау, уҡыуҙы тамамламау; **недоучи́ться в институ́те** институтты тамамламау

**НЕДОУ́ЧКА** *м* и *ж*; *разг.* һай белемле, төплө белем алмаған (*кеше*)

**НЕДОЧЁТ** *м* **1.** (*недостача*) етмәү, тулмау; **обнару́жить недочёт де́нег в ка́ссе** кассала аҡса етмәүҙе асыҡлау **2.** *обычно мн.* **недочёты** етешһеҙлектәр, кәмселектәр; **недочёты в рабо́те** эштәге етешһеҙлектәр

**НЕ́ДРА** *только мн.* **1.** ер аҫты, ер ҡуйыны; **в не́драх земли́** ер аҫтында **2.** *чего*, *какие*; *перен.* эс, төп, төпкөл; **в не́драх души́** күңел төбөндә

**НЕДРЕ́МЛЮЩИЙ,** -ая, -ее уяу, һаҡ, сос, һиҙгер; **недре́млющий сто́рож** уяу ҡарауылсы; **недре́млющий глаз** һиҙгер күҙ

**НЕ́ДРУГ** *м* дошман

**НЕДРУЖЕЛЮ́БИЕ** *с* күрә алмаусанлыҡ, яратмаусылыҡ, хөсөтлөк, хаслыҡ; **проявля́ть недружелю́бие** яратмаусылыҡ күрһәтеү

**НЕДРУЖЕЛЮ́БНЫЙ,** -ая, -ое күрә алмаусан, яратмаусан, үсле; **недружелю́бный взгляд** яратмаусан ҡараш

**НЕДРУ́ЖЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое дуҫ булмаған; **недру́жественные стра́ны** дуҫ булмаған илдәр

**НЕДУ́Г** *м* ауырыу, сир, сырхау; **тяжёлый неду́г** ҡаты сир

**НЕДУРНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*неплохой*) яҡшы (арыу) ғына, насар түгел; **недурно́й го́лос** арыу ғына тауыш **2.** *обычно кратк. ф.* (*довольно красивый*) матур (һылыу) ғына

**НЕДЮ́ЖИННЫЙ,** -ая, -ое күренекле, башҡаларҙан айырылып торған, ғәҙәттән тыш (ҙур); **недю́жинные спосо́бности** ғәҙәттән тыш һәләтлектәр

**НЕЕ́ЗЖЕНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*не приученный к езде*) өйрәтелмәгән, егелмәгән; **нее́зженый конь** өйрәтелмәгән ат **2.** (*ненаезженный*) (күптән) йөрөлмәгән, әҙ йөрөлгән; **нее́зженая доро́га** күптән йөрөлмәгән юл

**НЕЕСТЕ́СТВЕННОСТЬ** *ж* яһалмалыҡ, тәбиғи булмау; **неесте́ственность поведе́ния** тәртиптең (ҡылыҡ-ҡыланыштың) тәбиғи булмауы

**НЕЕСТЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** яһалма, тәбиғи булмаған; **неесте́ственный смех** яһалма көлөү **2.** (*ненормальный*, *необычный*) ғәҙәти (тәбиғи) булмаған; **неесте́ственная переме́на** ғәҙәти булмаған үҙгәреш ♦ **умере́ть неесте́ственной сме́ртью** үҙ үлеме менән үлмәү

**НЕЖА́РКИЙ,** -ая, -ое (бик) эҫе түгел, эҫе булмаған, йылы ғына; **нежа́ркая ба́ня** бик эҫе булмаған мунса; **нежа́ркие дни** эҫе булмаған көндәр

**НЕЖДА́ННО** и **НЕЖДА́ННО-НЕГА́ДАННО** *нареч.* (һис тә) көтмәгәндә, көтмәҫтән, уйламағанда; **нежда́нно уе́хать** көтмәгәндә китеп барыу

**НЕЖДА́ННЫЙ,** -ая, -ое *см.* **неожи́данный**; **нежда́нная встре́ча** көтөлмәгән осрашыу; **нежда́нный гость** көтөлмәгән ҡунаҡ

**НЕЖЕЛА́НИЕ** *с* теләк булмау, теләмәү; **нежела́ние игра́ть** уйнарға теләмәү

**НЕЖЕЛА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* кәрәкмәгәнлек, күңелгә ятмағанлыҡ, теләмәгәнлек; **нежела́тельность собы́тий** ваҡиғаларҙың кәрәкмәгәнлеге

**НЕЖЕЛА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кәрәкмәгән, күңелгә ятмаған, теләү(н)мәгән; **нежела́тельные после́дствия** кәрәкмәгән һөҙөмтәләр

**НЕ́ЖЕЛИ** *союз сравнит.*; *книжн.* (*чем*) -ға/-гә ҡарағанда; **сего́дня она́ оде́та лу́чше, не́жели вчера́** ул бөгөн кисәгегә ҡарағанда матурыраҡ кейенгән

**НЕЖЕНА́ТЫЙ,** -ая, -ое буйҙаҡ, өйләнмәгән; **нежена́тый па́рень** өйләнмәгән егет

**НЕ́ЖЕНКА** *ж* и *м*; *разг.* иркә, наҙлы (*кеше*); **расти́ не́женкой** иркә булып үҫеү

**НЕЖИВО́Й,** -ая, -ое **1.** үле, үлгән, тере булмаған; **ребёнок роди́лся неживо́й** бала үле тыуған **2.** (*неорганический*) йәнһеҙ, тере булмаған; **нежива́я приро́да** йәнһеҙ тәбиғәт **3.** (*вялый*) һүлпән, һүрән, дәртһеҙ, йәнһеҙ, күңелһеҙ; **неживо́й вид** йәнһеҙ (күңелһеҙ) ҡиәфәт **4.** *перен.* (*тусклый*) тоноҡ; **неживо́й свет** тоноҡ яҡтылыҡ

**НЕЖИЗНЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж* йәшәүгә һәләтһеҙлек; **нежизнеспосо́бность органи́зма** организмдың йәшәүгә һәләтһеҙлеге

**НЕЖИЗНЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәшәүгә һәләтһеҙ; **нежизнеспосо́бные кле́тки** йәшәүгә һәләтһеҙ күҙәнәктәр **2.** тормошҡа яраҡлашмаған; **нежизнеспосо́бная нату́ра** тормошҡа яраҡлашмаған натура

**НЕЖИЛО́Й,** -ая, -ое **1.** (*такой, в котором не живут*) кеше тормай (йәшәмәй) торған, кеше тормаған (йәшәмәгән); **нежилы́е места́** кеше йәшәмәгән урындар; **нежило́й дом** кеше йәшәмәгән йорт **2.** (*не приспособленный для жилья*) торорға яраҡһыҙ, йәшәү өсөн тәғәйенләнмәгән; **нежило́е помеще́ние** йәшәү өсөн тәғәйенләнмәгән йорт

**НЕ́ЖИТЬ** *несов. кого-что* иркәләү, иркәләндереү, наҙлау; **не́жить дете́й** балаларҙы иркәләү

**НЕ́ЖИТЬСЯ** *несов.* иркәләнеү, наҙланыу; **не́житься на со́лнце** ҡояшта иркәләнеү

**НЕ́ЖНИЧАТЬ** *несов. с кем-чем* и *без доп.*; *разг.* иркәләү, наҙлау, йомшаҡлыҡ күрһәтеү; **не́жничать с ребёнком** баланы иркәләү; **не́жничать с наруши́телями поря́дка** тәртип боҙоусыларға ҡарата йомшаҡлыҡ күрһәтеү

**НЕ́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** яғымлылыҡ, наҙлылыҡ, мөләйемлек, йомшаҡлыҡ; **не́жность взгля́да** ҡараштың яғымлылығы **2.** (*мягкость, ласка*) иркәләү; **матери́нская не́жность** әсә иркәләүе **3.** *обычно мн.* **не́жности**; *разг.* иркәләү һүҙҙәре, иркә, наҙлауҙар; **говори́ть не́жности** иркәләү һүҙҙәре һөйләү **4.** *обычно мн.* **не́жности**; *разг.* (*изнеженность*) иркәлек; **что́ за не́жности** был ниндәй иркәлек

**НЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*ласковый*) һөйкөмлө, мөләйем; **не́жный взгляд** мөләйем ҡараш **2.** (*мягкий*) йомшаҡ, наҙлы, нескә; **не́жная ко́жа** йомшаҡ тире **3.** (*приятный по окраске, звучанию и т.п.*) нәфис, яғымлы; **не́жный цвето́к** нәфис сәскә; **не́жный го́лос** яғымлы тауыш; **не́жный цвет** нәфис төҫ **4.** (*хрупкий, изнеженный*) нескә, иркә, ватылыусан; **не́жный прибо́р** ватылыусан прибор; **не́жный сте́бель** нескә һабаҡ; **не́жный ма́льчик** иркә малай ♦ **не́жный пол** ҡатын-ҡыҙ

**НЕЗАБВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *высок.* (мәңге) онотолмаҫ(лыҡ); **незабве́нные слова́** онотолмаҫ һүҙҙәр; **незабве́нный учи́тель** (мәңге) онотолмаҫлыҡ уҡытыусы

**НЕЗАБУ́ДКА** *ж* күгәрсен күҙе (*сәскә*)

**НЕЗАБЫВА́ЕМОСТЬ** *ж* онотолмаҫлыҡ булыу; **незабыва́емость собы́тий** ваҡиғаларҙың онотолмаҫлыҡ булыуы

**НЕЗАБЫВА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое онотолмаҫлыҡ, тәрән тәьҫир ҡалдырған; **незабыва́емые дни** онотолмаҫлыҡ көндәр

**НЕЗАВЕРШЁННОСТЬ** *ж* тамамланмағанлыҡ, осланмағанлыҡ; **незавершённость рабо́ты** эштең тамамланмағанлығы

**НЕЗАВЕРШЁННЫЙ,** -ая, -ое -ып/-еп тамамланмаған (бөтмәгән, осланмаған); **незавершённая кни́га** яҙылып бөтмәгән китап

**НЕЗАВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡһыҙ, ҡыҙығырлыҡ булмаған (түгел), насар; **незави́дное положе́ние** насар хәл

**НЕЗАВИ́СИМОСТЬ** *ж* бойондороҡһоҙлоҡ; **национа́льная незави́симость** милли бойондороҡһоҙлоҡ

**НЕЗАВИ́СИМЫЙ,** -ая, -ое **1.** бойондороҡһоҙ; **незави́симые стра́ны** бойондороҡһоҙ илдәр **2.** (*выражающий самостоятельность*) ирекле, буйһонмаусан; **незави́симый хара́ктер** буйһонмаусан характер

**НЕЗАВИ́СЯЩИЙ: по незави́сящим обстоя́тельствам** бәйле булмаған сәбәптәр (хәлдәр) арҡаһында

**НЕЗАДА́ЧА** *ж*; *разг.* уңышһыҙлыҡ, уңышһыҙ хәл; **что́ за незада́ча** был ниндәй уңышһыҙлыҡ

**НЕЗАДА́ЧЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** эше уңмай торған, ебегән, бешмәгән; **незада́чливый челове́к** эше уңмай торған кеше **2.** бәхетһеҙ, уңышһыҙ; **незада́чливая рабо́та** уңышһыҙ эш

**НЕЗАДО́ЛГО** *нареч.* аҙ ғына элек (алда), алдынан; **незадо́лго пе́ред пра́здником** байрамдан аҙ ғына алда

**НЕЗАЖИВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее уңалмаған, уңалмай торған; **незажива́ющая ра́на** уңалмаған яра

**НЕЗАИНТЕРЕСО́ВАННОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡһынмау, һалҡын ҡарау; **незаинтересо́ванность в де́ле** эш менән ҡыҙыҡһынмауҙы күрһәтеү, эшкә һалҡын ҡарау

**НЕЗАИНТЕРЕСО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡһынмаусы, һалҡын ҡараусы

**НЕЗАКОННОРОЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** никахһыҙ тыуған, тыума; **незаконнорождённый ребёнок** никахһыҙ тыуған бала **2.** *в знач. сущ.*

**незаконорождённый** *м* и **незаконнорождённая** *ж* никахһыҙ тыуған бала

**НЕЗАКО́ННОСТЬ** *ж* законһыҙлыҡ, законһыҙ булыу, законға һыймау (яраҡһыҙ булыу), закондан тыш булыу; **незако́нность тре́бований** талаптарҙың законға яраҡһыҙ булыуы

**НЕЗАКО́ННЫЙ,** -ая, -ое законһыҙ, закондан тыш эшләнгән, законға яраҡһыҙ (ҡаршы булған), законға һыймаған; **незако́нный докуме́нт** законға яраҡһыҙ документ; **незако́нный брак** законһыҙ өйләнешеү (никах)

**НЕЗАКОНОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое законға (ҡанунға) буйһонмаған; **незакономе́рное явле́ние** ҡанунға буйһонмаған күренеш

**НЕЗАКО́НЧЕННОСТЬ** *ж см.* **незавершённость**

**НЕЗАКО́НЧЕННЫЙ,** -ая, -ое *см.* **незавершённый**; **незако́нченное произведе́ние** яҙылып бөтмәгән әҫәр

**НЕЗАМЕДЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тотҡарһыҙ, тотҡарлыҡһыҙ, кисектергеһеҙ; **незамедли́тельный отве́т** кисектергеһеҙ яуап

**НЕЗАМЕНИ́МОСТЬ** *ж* алмаштырғыһыҙ булыу, алмашы булмау; **незамени́мость дета́лей** деталдәрҙең алмаштырғыһыҙ булыуы

**НЕЗАМЕНИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** алмаштырғыһыҙ, үтә кәрәкле; **незамени́мый специали́ст** алмаштырғыһыҙ белгес **2.** *см.* **невосполни́мый**

**НЕЗАМЕРЗА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее (ҡыш) туңмай торған; **незамерза́ющий родни́к** ҡыш туңмай торған шишмә

**НЕЗАМЕ́ТНО** *нареч.* һиҙҙермәйенсә (генә), һиҙелмәй(енсә), беленмәй, күренмәй; **зайти́ незаме́тно** һиҙҙермәйенсә барып кереү; **вре́мя прошло́ незаме́тно** ваҡыт һиҙелмәйенсә үтеп китте

**НЕЗАМЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** беленмәҫлек, беленмәгән, беленер-беленмәҫ, һиҙмәҫлек, тойолмаҫлыҡ; **незаме́тные следы́** беленер-беленмәҫ эҙҙәр; **незаме́тные измене́ния** тойолмаҫлыҡ үҙгәрештәр **2.** күренекһеҙ, күҙгә ташланып тормаған, башҡаларҙан айырылып тормаған; **незаме́тный челове́к** күренекһеҙ кеше

**НЕЗАМУ́ЖНИЙ,** -яя, -ее **1.** (*не состоящая в браке*) кейәүгә (тормошҡа) сыҡмаған, иргә бармаған, ирһеҙ; **незаму́жняя же́нщина** ирһеҙ ҡатын **2.** (*не связанный с замужеством*) кейәүһеҙ (ирһеҙ) булған (торған, йәшәгән), тормошҡа сыҡмай йәшәгән; **незаму́жние го́ды** тормошҡа сыҡмай йәшәгән йылдар

**НЕЗАМЫСЛОВА́ТОСТЬ** *ж* ябайлыҡ, ябай булыу; **незамыслова́тость рису́нка** һүрәттең ябай булыуы

**НЕЗАМЫСЛОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ябай, хикмәтһеҙ, ҡатмарлы булмаған, ҡәҙимге; **незамыслова́тый узо́р** ябай биҙәк **2.** *разг.* (*о человеке*) бер ҡатлы; **незамыслова́тый челове́к** бер ҡатлы кеше

**НЕЗАНИМА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡыҙыҡһыҙ булыу, мауыҡтырмай торған булыу, мауыҡтырғыһыҙ булыу; **незанима́тельность сюже́та** сюжеттың мауыҡтырғыһыҙ булыуы

**НЕЗАНИМА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙыҡһыҙ, мауыҡтырмай торған; **незанима́тельный расска́з** ҡыҙыҡһыҙ хикәйә

**НЕЗА́НЯТОСТЬ** *ж* буш булыу (тороу); **неза́нятость помеще́ния** йорттоң буш тороуы

**НЕЗА́НЯТЫЙ,** -ая, -ое буш, буш булған (торған), эштән буш (булған), эшһеҙ; **неза́нятое ме́сто** буш урын; **неза́нятый дом** буш (торған) йорт; **неза́нятый челове́к** эштән буш кеше

**НЕЗАПА́МЯТНЫЙ,** -ая, -ое бик күптәнге (боронғо), әллә ҡасанғы; **с незапа́мятных времён** бик боронғо замандарҙан

**НЕЗАПЛАНИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое пландаштыр(ыл)маған, алдан билдәләнмәгән (әҙерләнмәгән), планға индерелмәгән, алдан күрелмәгән (ҡаралмаған), көтөлмәгән; **незаплани́рованная рабо́та** алдан билдәләнмәгән эш; **незаплани́рованная встре́ча** көтөлмәгән осрашыу

**НЕЗАПЯ́ТНАННЫЙ,** -ая, -ое тапһыҙ, тапланмаған, керһеҙ, кер (тап) төшмәгән, саф; **незапя́тнанная репута́ция** тап төшмәгән абруй

**НЕЗАРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое йоғошһоҙ; **незара́зная боле́знь** йоғошһоҙ ауырыу

**НЕЗАСЛУ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое тейешһеҙ, урынһыҙ(ға), нахаҡ; **незаслу́женная оби́да** урынһыҙ үпкә

**НЕЗАТЕ́ЙЛИВОСТЬ** *ж* ябайлыҡ, ябай булыу, (артыҡ) ҡатмарлы булмау; **незате́йливость украше́ний** биҙәктәрҙең ябайлығы

**НЕЗАТЕ́ЙЛИВЫЙ,** -ая, -ое ябай, (артыҡ) ҡатмарлы булмаған, хикмәтһеҙ; **незате́йливая му́зыка** ябай көй

**НЕЗАУРЯ́ДНОСТЬ** *ж* талантлылыҡ, һәләтле (талантлы) булыу, ғәҙәттән тыш булыу, (башҡаларҙан) айырылып тороу; **незауря́дность актёра** актёрҙың таланты

**НЕЗАУРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое һәләтле, ғәҙәттән тыш, (башҡаларҙан) айырылып торған; **незауря́дное дарова́ние** ғәҙәттән тыш ҙур һәләт

**НЕ́ЗАЧЕМ** *нареч. в знач. сказ.*; *разг.* кәрәге юҡ, мәғәнәһе юҡ, юҡҡа, тиккә, бушҡа; **не́зачем там остава́ться** унда ҡалыуҙың кәрәге юҡ

**НЕЗВА́НЫЙ,** -ая, -ое саҡырылмаған; **незва́ный гость** саҡырылмаған ҡунаҡ

**НЕЗДЕ́ШНИЙ,** -яя, -ее *разг.* бында тормаған (йәшәмәгән), ситтән килгән, бындағы түгел; **незде́шний жи́тель** бында йәшәмәгән кеше

**НЕЗДОРО́ВИТЬСЯ** *несов. кому безл.* ауырып (ауырыҡһынып) тороу; **с утра́ нездоро́вится** иртәнән бирле ауырып торола

**НЕЗДОРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ауырыу, сирле, сырхау; **нездоро́вый вид** ауырыу төҫ **2.** сәләмәтлек (һаулыҡ) өсөн зарарлы; **нездоро́вый кли́мат** һаулыҡ өсөн зарарлы климат **3.** *перен.*

зарарлы, дөрөҫ булмаған, ғәҙәти булмаған; **нездоро́вое явле́ние** ғәҙәти булмаған күренеш; **нездоро́вое влия́ние** зарарлы йоғонто

**НЕЗДОРО́ВЬЕ** *с* сәләмәтлек (һаулыҡ) юҡлыҡ (булмау), сырхаулыҡ; **его́ беспоко́ит моё нездоро́вье** уны минең һаулыҡ булмау борсой

**НЕЗЕМНО́Й,** -ая, -ое **1.** Ер шарынан ситтә булған (торған); **неземны́е тела́** Ер шарынан ситтә булған есемдәр **2.** *трад.-поэт.*, *перен.* ғәҙәттән тыш (ҙур, көслө); **неземна́я си́ла** ғәҙәттән тыш ҙур көс

**НЕЗЛО́БИВОСТЬ** и **НЕЗЛОБИ́ВОСТЬ** *ж* хәйләһеҙлек, (йомшаҡ) күңеллелек, йыуашлыҡ, эскерһеҙлек; **незло́бивость хара́ктера** йомшаҡ тәбиғәтле булыу

**НЕЗЛО́БИВЫЙ** и **НЕЗЛОБИ́ВЫЙ,** -ая, -ое хәйләһеҙ, эскерһеҙ, йомшаҡ күңелле, йыуаш; **незло́бивый челове́к** йомшаҡ күңелле кеше

**НЕЗЛО́БНЫЙ,** -ая, -ое йомшаҡ, йыуаш, шәфҡәтле; **незло́бное отноше́ние** йомшаҡ мөнәсәбәт

**НЕЗЛО́Й,** -ая, -ое яҡшы (йомшаҡ) күңелле, эскерһеҙ, йыуаш, уҫал түгел (булмаған); **незло́й челове́к** йыуаш кеше

**НЕЗЛОПА́МЯТНЫЙ,** -ая, -ое кенә тотмаусы, үс (асыу) һаҡламаған; **у него́ незлопа́мятный хара́ктер** ул кенә тотмай

**НЕЗНА́ЙКА** *м* и *ж*; *разг.* бер нәмә лә белмәүсе

**НЕЗНАКО́МЕЦ** *м* сит (ят, таныш булмаған, күрмәгән-белмәгән) ир-ат; **незнако́мка** *ж* таныш булмаған (сит, ят, күрмәгән-белмәгән) ҡатын-ҡыҙ

**НЕЗНАКО́МЫЙ,** -ая, -ое таныш булмаған (түгел), белмәгән, танымаған, ят, сит; **незнако́мый челове́к** таныш түгел кеше; **незнако́мый текст** таныш булмаған текст

**НЕЗНА́НИЕ** *с* белмәү; **незна́ние чужо́го языка́** сит телде белмәү

**НЕЗНА́ЧАЩИЙ,** -ая, -ее әһәмиәтһеҙ, әһәмиәте аҙ, кәрәге аҙ, мөһим булмаған; **незна́чащий разгово́р** мөһим булмаған һөйләшеү

**НЕЗНАЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәләкәй, әҙ, ҙур булмаған; **незначи́тельная су́мма** әҙ аҡса; **незначи́тельная про́сьба** бәләкәй үтенес **2.** аҙ әһәмиәтле, әһәмиәте аҙ (булған), әһәмиәтһеҙ; **незначи́тельный вопро́с** аҙ әһәмиәтле мәсьәлә

**НЕЗРЕ́ЛОСТЬ** *ж* өлгөрмәгәнлек, етлекмәгәнлек, бешмәгәнлек, сейле-бешле булыу; **незре́лость плодо́в** емештәрҙең бешмәгәнлеге; **незре́лость мы́сли** фекерҙең өлгөрмәгәнлеге

**НЕЗРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *прям.*, *перен.* өлгөрөп (үҫеп) етмәгән, етлекмәгән, бешмәгән, сейле-бешле, сей; **незре́лое я́блоко** сей алма; **незре́лый ю́ноша** үҫеп етмәгән йәш егет; **незре́лый рома́н** сейле-бешле роман

**НЕЗРИ́МЫЙ,** -ая, -ое *книжн. см.* **неви́димый**

**НЕЗРЯ́ЧИЙ,** -ая, -ее **1.** һуҡыр; **незря́чие глаза́** һуҡыр күҙҙәр **2.** *в знач. сущ.* **незря́чий** *м* и **незря́чая** *ж* һуҡыр

**НЕЗЫ́БЛЕМЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* ҡаҡшамаҫ, емерелмәҫ, ныҡ; **незы́блемая осно́ва** ҡаҡшамаҫ нигеҙ

**НЕИДЕНТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тиң (оҡшаш, берҙәй) булмаған (түгел); **неидентичные явле́ния** оҡшаш булмаған күренештәр

**НЕИЗБЕ́ЖНОСТЬ** *ж* ҡотолғоһоҙлоҡ, ҡотолғоһоҙ булыу; **неизбе́жность перехо́да** күсеүҙең ҡотолғоһоҙ булыуы

**НЕИЗБЕ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое ҡотолғоһоҙ; **пораже́ние неизбе́жно** еңелеү ҡотолғоһоҙ

**НЕИЗБЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* онотолмаҫ, онотолмай торған, бөтмәҫ, бөтмәй (уҙмай) торған; **неизбы́вная тоска́** онотолмаҫ һағыш

**НЕИЗВЕ́ДАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** өйрәнелмәгән, тикшерелмәгән; **неизве́данный край** өйрәнелмәгән яҡ **2.** һыналмаған, билгеһеҙ, баштан кисермәгән (уҙмаған); **неизве́данное чу́вство** баштан кисермәгән тойғо

**НЕИЗВЕ́СТНО 1.** *нареч.* билдәһеҙ, билдәле булмаған; **перее́хать неизве́стно куда́** билдәле булмаған ергә күсеү **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* билдәһеҙ, билдәле түгел; **кто э́то сказа́л, неизве́стно** кем әйткәндер, билдәһеҙ

**НЕИЗВЕ́СТНОСТЬ** *ж* **1.** билдәһеҙлек, билдәле (мәғлүм, таныш) булмау; **неизве́стность бу́дущего** киләсәктең билдәһеҙлеге (*алда ни булырын белмәү*) **2.** күренекһеҙлек, танылмау, халыҡҡа билдәле булмау; **жить в неизве́стности** билдәһеҙлектә йәшәү

**НЕИЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** билдәһеҙ, билдәле (таныш) булмаған; **неизве́стная доро́га** билдәһеҙ юл **2.** танылмаған, күренекһеҙ, данлыҡһыҙ; **неизве́стный писа́тель** танылмаған яҙыусы **3.** *в знач. сущ.* **неизве́стный** *м* и **неизве́стная** *ж см.* **незнако́мец 4.** *в знач. сущ.* **неизве́стное** *с*; *мат.* билдәһеҙ һан; **найти́ неизве́стное** билдәһеҙ һанды табыу

**НЕИЗГЛАДИ́МЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* онотолмаҫ(лыҡ), юйылмаҫ(лыҡ), иҫтән (хәтерҙән) сыҡмаҫлыҡ, тәрән; **неизглади́мое впечатле́ние** тәрән тәьҫир; **неизглади́мые воспомина́ния** иҫтән сыҡмаҫлыҡ хәтирәләр

**НЕИЗЛЕЧИ́МЫЙ,** -ая, -ое дауалап булмай (төҙәлмәй, йүнәлмәй) торған; **неизлечи́мая боле́знь** дауалап булмай торған ауырыу

**НЕИЗМЕ́ННОСТЬ** *ж* үҙгәрмәүсәнлек, үҙгәрмәҫлек, даимилыҡ; **неизме́нность пра́вил** ҡағиҙәләрҙең даимилығы

**НЕИЗМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*постоянный*) үҙгәрмәй торған, үҙгәрмәҫ, үҙгәрешһеҙ, даими; **неизме́нные привы́чки** үҙгәрмәй торған ғәҙәттәр; **неизме́нная величина́** *мат.* даими дәүмәл **2.** (*обязательный*) ғәҙәттәге, һәр ваҡыттағы; **на голове́ у неё неизме́нный бе́лый плато́к** уның ба-

шында ғәҙәттәге аҡ яулыҡ **3.** (*верный*) ышаныслы, ысын, тоғро; **неизме́нный друг** ысын дуҫ

**НЕИЗМЕНЯ́ЕМОСТЬ** *ж* үҙгәрмәй торған булыу, үҙгәрмәүсәнлек; **неизменя́емость наре́чий** *грам.* рәүештәрҙең үҙгәрмәүсәнлеге

**НЕИЗМЕНЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое үҙгәрмәй торған, үҙгәрмәҫ, төрләнмәй (төрләнмәй) торған; **неизменя́емые ча́сти ре́чи** *грам.* үҙгәрмәй торған һүҙ төркөмдәре

**НЕИЗМЕРИ́МЫЙ,** -ая, -ое сағыштырғыһыҙ, сағыштырғыһыҙ дәрәжәлә, сикһеҙ (ҙур), үлсәгеһеҙ, икһеҙ-сикһеҙ; **неизмери́мые простра́нства** икһеҙ-сикһеҙ киңлектәр

**НЕИЗУ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое өйрәнелмәгән, тикшерелмәгән; **неизу́ченная пробле́ма** тикшерелмәгән мәсьәлә

**НЕИЗЪЯСНИ́МЫЙ,** -ая, -ое аңлатып бирә алмаҫлыҡ, аңлатып булмай торған, аңлатҡыһыҙ, төшөндөргөһөҙ; **неизъясни́мое волне́ние** аңлатып бирә алмаҫлыҡ тулҡынланыу

**НЕИМЕ́НИЕ: за неиме́нием** *кого-чего* булмау сәбәпле, юҡлығы арҡаһында; **за неиме́нием вре́мени** ваҡыт булмау сәбәпле

**НЕИМОВЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое ғәҙәттән тыш (ҙур, күп); **с неимове́рной быстрото́й** ғәҙәттән тыш ҙур тиҙлек менән; **неимове́рные тру́дности** ғәҙәттән тыш (күп) ауырлыҡтар

**НЕИМУ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** ярлы, мөлкәтһеҙ, фәҡир; **неиму́щие лю́ди** фәҡир кешеләр **2.** *в знач. сущ.* **неиму́щие** *мн.* фәҡирҙәр, ярлылар

**НЕИНТЕЛЛИГЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое интеллигентҡа хас булмаған, тәрбиәһеҙ, культураһыҙ, мәҙәниәтһеҙ; **неинтеллиге́нтный челове́к** культураһыҙ кеше

**НЕИНТЕРЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** насар, ҡыҙыҡ булмаған, ҡыҙыҡһыҙ, күңелһеҙ; **неинтере́сная кни́га** ҡыҙыҡ булмаған китап **2.** һөйкөмһөҙ, күрмәлекһеҙ; **неинтере́сный челове́к** һөйкөмһөҙ кеше; **неинтере́сная вне́шность** күрмәлекһеҙ ҡиәфәт

**НЕИСКОРЕНИ́МЫЙ,** -ая, -ое ныҡ тамыр йәйгән, төҙәтеүе ҡыйын булған, төҙәткеһеҙ; **неискорени́мые привы́чки** ныҡ тамыр йәйгән ғәҙәттәр

**НЕИ́СКРЕННЕ** и **НЕИ́СКРЕННО** *нареч.* ысын күңелдән -мау/-мәү; **говори́ть неи́скренне** ысын күңелдән һөйләмәү

**НЕИ́СКРЕННИЙ,** -яя, -ее **1.** ике йөҙлө, эскерле; **неи́скренний челове́к** ике йөҙлө кеше **2.** ысын күңелдән булмаған, яһалма; **неи́скреняя похвала́** яһалма маҡтау

**НЕИ́СКРЕННОСТЬ** *ж* ике йөҙлөлөк, эскерлелек, ысын күңелдән булмағанлыҡ, яһалмалылыҡ; **неи́скренность чувств** тойғоларҙың яһалмалылығы

**НЕИСКУШЁННОСТЬ** *ж* тәжрибәһеҙлек, тәжрибәһе булмағанлыҡ; **неискушённость в жите́йских вопро́сах** тормош мәсьәләләрендәге тәжрибәһеҙлек

**НЕИСКУШЁННЫЙ,** -ая, -ое тәжрибәһеҙ, тәжрибәһе булмаған; **неискушённая молодёжь** тәжрибәһеҙ йәштәр

**НЕИСПОВЕДИ́МЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* аҡыл етмәҫлек, аңламаҫлыҡ; **неисповеди́мые поворо́ты судьбы́** яҙмыштың аҡыл етмәҫлек үҙгәрештәре

**НЕИСПОЛНИ́МОСТЬ** *ж* үтәп булмаҫлыҡ, үтәгеһеҙ, үтәлмәҫлек (үтәй алмаҫлыҡ) булыу; **неисполни́мость тре́бований** талаптарҙың үтәй алмаҫлыҡ булыуы

**НЕИСПОЛНИ́МЫЙ,** -ая, -ое үтәп булмаҫлыҡ, үтәлмәҫлек, үтәй алмаҫлыҡ, үтәлә алмай торған, тормошҡа ашмаҫлыҡ (ашмай торған); **неисполни́мая мечта́** тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял

**НЕИСПОЛНИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* тыңлауһыҙ булыу, теүәл башҡармау, үтәмәүсәнлек; **порица́ть за неисполни́тельность** тейешенсә башҡармау өсөн шелтәләү

**НЕИСПОЛНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое теүәл үтәмәгән (башҡармай торған), тыңлап бармаусан; **неисполни́тельный челове́к** тыңлап бармаусан кеше

**НЕИСПО́РЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** боҙолмаған; **неиспо́рченные проду́кты** боҙолмаған ризыҡтар **2.** *перен.* яҡшы холоҡло, тәрбиәле, әхлаҡлы; **неиспо́рченный челове́к** әхлаҡлы кеше

**НЕИСПРАВИ́МОСТЬ** *ж* төҙәткеһеҙ, төҙәтерлек түгел, төҙәтеүе мөмкин булмаған (ҡыйын булыу); **неисправи́мость оши́бки** хатаның төҙәткеһеҙ булыуы

**НЕИСПРАВИ́МЫЙ,** -ая, -ое төҙәлмәҫлек, төҙәткеһеҙ, төҙәтеүе мөмкин булмаған

**НЕИСПРА́ВНОСТЬ** *ж* төҙөк булмау, боҙоҡ булыу, ватыҡлыҡ, боҙоҡлоҡ; **неиспра́вность маши́ны** машинаның боҙоҡ булыуы (боҙоҡлоғо)

**НЕИСПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ватыҡ, боҙоҡ, төҙөк түгел; **неиспра́вный радиоприёмник** ватыҡ радиоалғыс **2.** (*неаккуратный, недобросовестный*) ваҡытында -маусы/-мәүсе; **неиспра́вный плате́льщик** (бурысын) ваҡытында түләмәүсе

**НЕИССЯКА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* бөткөһөҙ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ, икһеҙ-сикһеҙ; **неиссяка́емая си́ла** бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс

**НЕИ́СТОВСТВО** *с* **1.** ярһыулыҡ, ҡоторғанлыҡ, шашҡанлыҡ; **приходи́ть в неи́стовство** ярһыу; **приводи́ть в неи́стовство** ярһытыу **2.** (*жестокость*) рәхимһеҙлек, ҡанһыҙлыҡ, йәнһеҙлек, оятһыҙлыҡ; **неи́стовство врага́** дошмандың рәхимһеҙлеге

**НЕИ́СТОВСТВОВАТЬ** *несов.* ярһыу, ҡотороноу, шашыу; **враг неи́стовствовал** дошман ҡоторондо; **мо́ре неи́стовствовало** диңгеҙ ҡоторондо

**НЕИ́СТОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡыҙыу, ярһыу, **неи́стовый хара́ктер** ярһыу холоҡ **2.** ғәҙәттән

тыш көслө; **нейстовая бýря** ғәҙәттән тыш көслө дауыл

**НЕИСТОЩИ́МЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* бөткөһөҙ, бөтмәç, бөтмәç-төкәнмәç, икһеҙ-сикһеҙ (күп), бай; **неистощи́мые бога́тства** бөтмәç-төкәнмәç байлыҡтар

**НЕИСТРЕБИ́МЫЙ,** -ая, -ое (ҡырып) бөтөрә алмаçлыҡ, (ҡырып) бөтөргөһөҙ, юҡ иткеһеҙ, бөтмәç-төкәнмәç; **неистреби́мая ве́ра** бөтмәç-төкәнмәç ышаныс; **неистреби́мый за́пах** бөтөргөһөҙ еç

**НЕИСЦЕЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* һауыҡтырып (терелтеп, сәләмәтләндереп) булмай торған; **неисцели́мая боле́знь** һауыҡтырып булмай торған ауырыу

**НЕИСЧЕРПА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *см.* **неистощи́мый**

**НЕИСЧИСЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое һанап бөтөргөһөҙ, иçәп-хисапһыҙ, бихисап; **неисчисли́мые бога́тства** иçәп-хисапһыҙ байлыҡ

**НЕЙЛО́Н** *м* нейлон (*яһалма сүс һәм шунан эшләнгән туҡыма*)

**НЕЙЛО́НОВЫЙ,** -ая, -ое нейлон ...ы; **нейло́новые чулки́** нейлон ойоҡтар

**НЕЙРОДЕРМИ́Т** *м* нейродермит (*тире ауырыуы*)

**НЕЙРО́Н** *м* нейрон (*нервы туҡымаһының төп элементы*)

**НЕЙРОХИРУ́РГ** *м* нейрохирург, нейрохирургия белгесе

**НЕЙРОХИРУРГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое нейрохирургик, нейрохирургия ...ы; **нейрохирурги́ческий институ́т** нейрохирургия институты

**НЕЙРОХИРУРГИ́Я** *ж* нейрохирургия (*медицинаның нервы системаһындағы органик ауырыуҙарҙы хирургия юлы менән дауалауҙы өйрәнә торған бүлеге*)

**НЕЙТРАЛИЗА́ЦИЯ** *ж см.* **нейтрализова́ть**

**НЕЙТРАЛИЗОВА́ТЬ** *сов., несов. кого-что* нейтралләштереү, нейтрализациялау; **нейтрализова́ть а́рмию** армияны нейтралләштереү; **нейтрализова́ть раство́р** иретмәне нейтралләштереү

**НЕЙТРАЛИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* нейтралләшеү; **щёлочь нейтрализова́лась** һелте нейтралләшкән **2.** *несов. страд. от* **нейтрализова́ть**

**НЕЙТРАЛИТЕ́Т** *м* нейтралитет, бер яҡҡа ла ҡатнашмау(сылыҡ), битарафлыҡ; **сохраня́ть нейтралите́т** *полит.* битарафлыҡ һаҡлау; **догово́р о нейтралите́те** битарафлыҡ тураһында килешеү

**НЕЙТРА́ЛЬНОСТЬ** *ж* нейтраллек, бер яҡҡа ла ҡатнашмау, битарафлыҡ; **по́лная нейтра́льность** тулы битарафлыҡ

**НЕЙТРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* нейтраль, битараф; **нейтра́льные стра́ны** битараф илдәр; **нейтра́льные во́ды** нейтраль һыуҙар; **нейтра́льное лека́рство** *спец.* нейтраль дарыу; **нейтра́льный раство́р** *хим.* нейтраль иретмә; **нейтра́льные части́цы** *физ.* нейтраль өлөшсәләр

**НЕЙТРИ́НО** *с*; *физ.* нейтрино

**НЕЙТРО́Н** *м*; *физ.* нейтрон

**НЕЙТРО́ННЫЙ,** -ая, -ое *физ.* нейтрон ...ы; **нейтро́нная бо́мба** нейтрон бомба

**НЕКАЗИ́СТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* күркһеҙ, йәмһеҙ, килбәтһеҙ; **некази́стая вне́шность** күркһеҙ (тышҡы) ҡиәфәт

**НЕКВАЛИФИЦИ́РОВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** квалификацияһыҙ, квалификацияһы булмаған; **неквалифици́рованный рабо́чий** квалификацияһы (махсус белеме, һөнәре) булмаған (әҙерлекһеҙ) эшсе **2.** махсус әҙерлек (белем) талап итмәй торған; **неквалифици́рованный труд** махсус белем талап итмәй торған хеҙмәт

**НЕ́КИЙ,** -ая, -ое *мест.* ниндәйҙер, ҡайһылыр, билдәһеҙ; **не́кий челове́к** билдәһеҙ кеше

**НЕ́КОГДА I** *нареч. в знач. сказ.* (буш) ваҡыт юҡ; **сего́дня мне не́когда** бөгөн (минең) ваҡытым юҡ

**НЕ́КОГДА II** *нареч.* (*когда-то*) ҡасандыр, әллә ҡасан, күптән; **не́когда здесь бы́ло о́зеро** ҡасандыр бында күл бар ине

**НЕ́КОГО** *мест., с неопр.* (*в значении* "*нет никого, кто*") -лыҡ/-лек кеше юҡ; **не́кого посла́ть** ебәрерлек кеше юҡ; **не́кого оста́вить** ҡалдырыр(лыҡ) кеше юҡ; **не́ с кем посове́товаться** кәңәшләшер(ҙәй) кеше юҡ: **не́ о ком вспо́мнить** иçкә алыр(ҙай) кеше юҡ

**НЕКОЛЕБИ́МЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* **1.** тирбәлмәй, сайҡалмай торған, хәрәкәтһеҙ (ҡатып) ҡалған; **неколеби́мое мо́ре** хәрәкәтһеҙ (тулҡынланмай, тыныс) ҡалған диңгеҙ **2.** *перен. см.* **непоколеби́мый**

**НЕКОМПЕТЕ́НТНОСТЬ** *ж* компетентлы булмау, компетентһыҙлыҡ; **укоря́ть в некомпете́нтности** компетентлы булмаулыҡта ғәйепләү

**НЕКОМПЕТЕ́НТНЫЙ,** -ая, -ое компетентһыҙ, компетентлы (тейешле белемле) булмаған; **некомпете́нтный челове́к** компетентһыҙ кеше

**НЕКОМПЛЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое тулы комплектлы булмаған; **некомпле́ктное обору́дование** тулы (комплектлы) булмаған ҡорамал

**НЕКОНТА́КТНОСТЬ** *ж* (кеше менән) аралашып (ҡатнашып) бармау; **проявля́ть неконта́ктность** кеше менән ҡатнашып бармау

**НЕКОНТА́КТНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (кеше менән) аралашып (ҡатнашып) бармаған

**НЕКОНТРОЛИ́РУЕМЫЙ,** -ая, -ое күҙәтеп (контролдә тотоп) булмаған

**НЕКОРРЕ́КТНОСТЬ** *ж* тупаçлыҡ, әҙәпһеҙлек; **прояви́ть некорре́ктность** тупаçлыҡ күрһәтеү

**НЕКОРРЕ́КТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тупаç, әҙәпһеҙ; **некорре́ктное обраще́ние** тупаç мөғәмәлә

**2.** (*в шахматной игре — ошибочный*) дөрөҫ булмаған, хата; **некорре́ктный ход** хата йөрөш

**НЕ́КОТОРЫЙ,** -ая, -ое *мест.* **1.** (*какой-то*) ниндәйҙер, күпмелер; **в не́котором расстоя́нии от бе́рега** ярҙан ниндәйҙер алыҫлыҡта; **по́сле не́которого вре́мени** күпмелер ваҡыттан һуң **2.** *только мн.* **не́которые** ҡайһы бер; **в не́которых райо́нах** ҡайһы бер райондарҙа **3.** (*незначительный*) бер аҙ, бер ни тиклем (ҡәҙәр); **собра́ть не́которую су́мму** бер аҙ аҡса йыйыу **4.** *в знач. сущ.* **не́которые** *мн.* ҡайһы берәүҙәр, ҡайһы бер кешеләр ♦ **в не́котором ро́де**; **не́которым о́бразом** бер ни тиклем (ҡәҙәр), бер аҙ

**НЕКРАСИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәмһеҙ, ямаҡ, килбәтһеҙ, күркһеҙ, иләмһеҙ; **некраси́вое лицо́** йәмһеҙ йөҙ **2.** *разг.* (*нечестный*) намыҫһыҙ, оятһыҙ, насар; **некраси́вый посту́пок** насар ҡылыҡ

**НЕКРА́ШЕНЫЙ,** -ая, -ое буялмаған, манылмаған; **некра́шеный забо́р** буялмаған ҡойма; **некра́шеная шерсть** манылмаған йөн

**НЕКРЕДИТОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое бурысҡа алғанды ҡайтарып бирә алмаған (бирергә һәләте, мөмкинселеге булмаған), бурысҡа алғанды түләй алмаған; **некредитоспосо́бная организа́ция** бурысҡа алғанды түләргә мөмкинселеге булмаған ойошма

**НЕКРЕ́ПКИЙ,** -ая, -ое **1.** мурт, ныҡ булмаған, ватылып торған; **некре́пкий лёд** мурт боҙ **2.** (*физически слабый*) сибек; **некре́пкий ребёнок** сибек бала **3.** (*ненасыщенный*) шыйыҡ, йомшаҡ; **некре́пкий чай** шыйыҡ сәй; **некре́пкий таба́к** йомшаҡ тәмәке

**НЕКРИТИ́ЧЕСКИЙ** и **НЕКРИТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тәнҡитһеҙ; **некрити́ческое отноше́ние к де́лу** эшкә тәнҡитһеҙ ҡарау

**НЕКРО́З** *м*; *мед.* некроз (*туҡыманың үле хәлгә килеүе, үлеүе*)

**НЕКРОЛО́Г** *м* некролог (*кеше үлеү сәбәпле уның тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында яҙылған мәҡәлә*)

**НЕКРО́ПОЛЬ** *м* некрополь (**1.** *боронғо ҡалаларҙағы ҙур зыярат* **2.** *данлыҡлы кешеләр зыяраты*)

**НЕКСТА́ТИ** *нареч.* ваҡытһыҙ, урынһыҙ; **прийти́ некста́ти** ваҡытһыҙ килеү; **сде́лать замеча́ние некста́ти** урынһыҙ иҫкәртеү яһау

**НЕКТА́Р** *м*; *бот.* нектар

**НЕКТА́РНИК** *м*; *бот.* нектарник (*сәскәләге баллы шыйыҡса бүлеп сығара торған орган*), татлыҡ

**НЕ́КТО** *мест.* (*кто-то*) кемдер, тигән бер кеше (берәү), ниндәйҙер (кеше); **не́кто Петро́в** Петров тигән бер кеше

**НЕ́КУДА** *нареч. с неопр.* -р/-рға/-ргә урын (ер) юҡ; **не́куда идти́** барыр ер юҡ

**НЕКУЛЬТУ́РНОСТЬ** *ж* культураһыҙлыҡ, мәҙәниәтһеҙлек, тәрбиәһеҙлек, әҙәпһеҙлек; **отлича́ться некульту́рностью** тәрбиәһеҙлеге менән айырылып тороу

**НЕКУЛЬТУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*отсталый*) культураһыҙ, түбән мәҙәниәтле, культура (әҙәп, тәрбиә) яғынан артта ҡалған **2.** тәрбиәһеҙ, мәҙәниәтһеҙ, тупаҫ; **некульту́рный челове́к** мәҙәниәтһеҙ кеше **3.** (*о растениях*) культуралаштырылмаған, ҡырағай; **некульту́рная я́блоня** ҡырағай алмағас

**НЕКУРЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** (тәмәке) тартмай торған (тартмаған); **некуря́щие лю́ди** тәмәке тартмаған кешеләр **2.** *в знач. сущ.* **некуря́щий** *м* и **некуря́щая** *ж* тәмәке тартмаған кеше

**НЕЛА́ДНО** *нареч. в знач. сказ.*; *разг.* шәптән (яҡшынан) түгел, алама, хөрт, насар; **у него́ нела́дно со здоро́вьем** уның һаулығы шәптән түгел

**НЕЛА́ДНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** яҡшынан булмаған, ярамаған, насар; **произошло́ что́-то нела́дное** ниндәйҙер насар хәл килеп тыуҙы **2.** (*неловкий*) килбәтһеҙ, йәмһеҙ; **нела́дный па́рень** килбәтһеҙ егет

**НЕЛАДЫ́** *только мн.*; *разг.* **1.** (*ссоры*) ыҙғыш, талаш-тартыш, ығы-зығы, үҙ-ара тынышмау(сылыҡ); **семе́йные нелады́** ғаиләләге талаш-тартыш **2.** (*неудачи*) уңышһыҙлыҡ(тар); **нелады́ в рабо́те** эштәге уңышһыҙлыҡтар **3.** (*неполадки*) ватыҡ (боҙоҡ, етешмәгән) урын (ер), кәмселектәр, етешһеҙлектәр; **на экскава́торе есть нелады́** экскаваторҙың ватыҡ урындары бар

**НЕЛА́СКОВЫЙ,** -ая, -ое һөймәлекһеҙ, яғымһыҙ; **нела́сковый ребёнок** һөймәлекһеҙ бала

**НЕЛЕГА́ЛЬНОСТЬ** *ж* йәшерен (йәшертен) булыу, тыйылған булыу; **нелега́льность организа́ции** ойошманың тыйылған булыуы

**НЕЛЕГА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йәшерен, йәшертен, тыйылған; **нелега́льная газе́та** тыйылған гәзит

**НЕЛЕГА́ЛЬЩИНА** *ж*; *разг.* йәшерен баҫылған әҙәбиәт, йәшерен башҡарылған (булған) эш

**НЕЛЁГКИЙ,** -ая, -ое (шаҡтай) ауыр, ҡыйын; **нелёгкая но́ша** ауыр йөк; **нелёгкая рабо́та** ауыр эш; **нелёгкий хара́ктер** ауыр холоҡ; **нелёгкие усло́вия** ҡыйын шарттар ♦ **нелёгкая принесла́ (занесла́, несёт)** *кого*; *разг.*, *неодобр.* кәрәге бер тин инә, нимәгә кәрәге (хәжәте) бар (*ваҡытһыҙ, кәрәкһеҙ, кәрәкһеҙгә килгән кешегә ҡарата*)

**НЕЛЕГКО́ 1.** *нареч.* ауыр, ҡыйын; **он живёт нелегко́** ул ауыр (тормошта) йәшәй **2.** *в знач. сказ.*, *безл.* ауыр, ҡыйын; **ему́ нелегко́** уға ауыр

**НЕЛЕ́ПИЦА** *ж*; *разг. см.* **неле́пость** 2

**НЕЛЕ́ПОСТЬ** *ж* **1.** мәғәнәһеҙлек; **неле́пость слу́хов** хәбәрҙәрҙең мәғәнәһеҙлеге **2.** юҡ-бар (мәғәнәһеҙ) һүҙ, фекер, йәмһеҙ ҡылыныш; **говори́ть неле́пости** юҡ-бар һүҙ һөйләү

**НЕЛЕ́ПЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*бессмысленный*) мәғәнәһеҙ, урынһыҙ; **неле́пая мысль** мәғәнәһеҙ уй **2.** (*нескладный, неуклюжий*) килбәтһеҙ, ки-

лешһеҙ, шөкәтһеҙ, шыҡһыҙ; **неле́пая фигу́ра** шөкәтһеҙ кәүҙә

**НЕЛЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое насар, кире; **неле́стный о́тзыв о кни́ге** китапҡа насар баһа

**НЕЛЁТНЫЙ,** -ая, -ое осмай торған, осорға ярамаған; **нелётная пого́да** осорға ярамаған һауа торошо

**НЕЛИКВИ́Д** *м*; *спец.* неликвид (*файҙаланылмау сәбәпле һатылырға, бөтөрөлөргә тейешле мөлкәт*)

**НЕЛИКВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое файҙаланылмау сәбәпле һатылырға тейешле; **неликви́дные материа́лы** файҙаланылмау сәбәпле һатылырға тейешле материалдар

**НЕЛИЦЕПРИЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* ғәҙел, тура; **нелицеприя́тное мне́ние** ғәҙел фекер

**НЕЛИ́ШНЕ** *нареч. в знач. сказ., с неопр.* артыҡ түгел (булмаҫ), зарары булмаҫ; **нели́шне бу́дет сказа́ть об э́том** был турала әйтеп китеүҙең зарары булмаҫ

**НЕЛИ́ШНИЙ,** -яя, -ее кәрәкле, урынлы; **нели́шняя для хозя́йства вещь** хужалыҡ өсөн кәрәкле әйбер

**НЕЛО́ВКИЙ,** -ая, -ое **1.** (*неуклюжий*) ҡулайһыҙ, уңайһыҙ, ипһеҙ, абайһыҙ, сос түгел; **нело́вкое движе́ние** ипһеҙ хәрәкәт **2.** (*неприятный, тягостный*) күңелһеҙ, уңайһыҙ; **попа́сть в нело́вкое положе́ние** уңайһыҙ хәлгә ҡалыу **3.** *разг.* (*неудобный*) яйһыҙ, килешһеҙ; **нело́вкая по́за** яйһыҙ торош

**НЕЛО́ВКО 1.** *нареч.* ипһеҙ, уңайһыҙ, яйһыҙ, ҡыйын; **держа́ть нело́вко** яйһыҙ тотоу **2.** *в знач. сказ., безл.* ипһеҙ, уңайһыҙ, яйһыҙ, ҡыйын; **говори́ть об э́том нело́вко** был турала һөйләү уңайһыҙ

**НЕЛО́ВКОСТЬ** *ж* **1.** уңайһыҙлыҡ, яйһыҙлыҡ, ипһеҙлек, килешһеҙлек; **нело́вкость движе́ний** хәрәкәттәрҙең яйһыҙлығы **2.** килешмәгән (ярамаған) эш, килешмәгән ҡыланыш; **загла́дить нело́вкость** килешмәгән ҡыланышты төҙәтеү **3.** (*смущение*) уңайһыҙланыу, оялыу, уңайһыҙлыҡ; **почу́вствовать нело́вкость** уңайһыҙлыҡ һиҙеү

**НЕЛОГИ́ЧНОСТЬ** *ж* логикаһы булмау, эҙмә-эҙлелек булмау, эҙмә-эҙлекһеҙ (ҡаршылыҡлы) булыу; **нелоги́чность посту́пка** ҡылыҡтың ҡаршылыҡлы булыуы

**НЕЛОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое логикаһыҙ, логикаһы булмау, эҙмә-эҙлекһеҙ, ҡаршылыҡлы; **нелоги́чная мысль** эҙмә-эҙлекһеҙ фекер

**НЕЛЬЗЯ́** *нареч. в знач. сказ.* **1.** (*невозможно*) мөмкин түгел, -п булмай; **без друзе́й жить нельзя́** дуҫтарһыҙ йәшәп булмай **2.** (*не допускается*) ярамай; **здесь кури́ть нельзя́** бында тартырға ярамай ♦ **как нельзя́ лу́чше** мөмкин тиклем яҡшыраҡ; **нельзя́ ли** булмаймы, мөмкин булмаҫмы, ярамаҫмы; **нельзя́ сказа́ть, что́бы** (тип) әйтеп булмай

**НЕ́ЛЬМА** *ж* нельма (*балыҡ*)

**НЕ́ЛЬМОВЫЙ,** -ая, -ое нельма ...ы; **не́льмовый про́мысел** нельма аулау кәсебе

**НЕЛЮБЕ́ЗНОСТЬ** *ж* тупаҫлыҡ, ихтирам күрһәтмәү; **показа́ть нелюбе́зность** тупаҫлыҡ күрһәтеү

**НЕЛЮБЕ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое яғымһыҙ, тупаҫ, ҡараңғы сырайлы; **нелюбе́зный хозя́ин** ҡараңғы сырайлы хужа; **нелюбе́зный отве́т** тупаҫ яуап

**НЕЛЮБИ́МЫЙ,** -ая, -ое яратмаған, һөймәгән; **нелюби́мое де́ло** яратмаған эш

**НЕЛЮБО́ВЬ** *ж* һөймәү, яратмау; **нелюбо́вь к однокла́сс396нику** һабаҡташыңды яратмау

**НЕЛЮДИ́М** *м* и **НЕЛЮДИ́МКА** *ж* ҡырыҫ (кеше); **оте́ц мой был нелюди́м** атайым ҡырыҫ кеше ине

**НЕЛЮДИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡырыҫ; **нелюди́мый хара́ктер** ҡырыҫ холоҡ **2.** (*безлюдный, пустынный*) буш, кешеһеҙ, кеше йөрөмәгән, кеше аяғы баҫмаған; **нелюди́мые края́** кеше аяғы баҫмаған яҡтар

**НЕМА́ЛО** *нареч.* әҙ түгел, байтаҡ ҡына, шаҡтай күп; **нема́ло вре́мени прошло́** шаҡтай күп ваҡыт үтеп китте

**НЕМАЛОВА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое мөһим, әһәмиәтле; **немалова́жные обстоя́тельства** мөһим сәбәптәр

**НЕМА́ЛЫЙ,** -ая, -ое *в разн. знач.* байтаҡ, хәтһеҙ күп (ҙур), арыу уҡ ҙур, (шаҡтай) ҙур ғына; **нема́лые де́ньги** хәтһеҙ күп аҡса; **нема́лая по́мощь** ҙур ғына ярҙам; **нема́лый труд** шаҡтай ҙур хеҙмәт

**НЕМЕ́ДЛЕННО** *нареч.* кисектермәй(енсә), тиҙ генә, хәҙер үк, тиҙ арала, ашығыс рәүештә; **неме́дленно приня́ть ме́ры** ашығыс рәүештә саралар күреү

**НЕМЕ́ДЛЕННЫЙ,** -ая, -ое кисектергеһеҙ, ашығыс, тиҙ, тотҡарлыҡһыҙ; **неме́дленный отве́т** тотҡарлыҡһыҙ яуап

**НЕМЕ́ДЛЯ** *нареч. см.* **неме́дленно**

**НЕМЕ́РКНУЩИЙ,** -ая, -ее *высок., прям., перен.* һүнмәҫ; **неме́ркнущая сла́ва** һүнмәҫ дан

**НЕМЕ́ТЬ** *несов.* **1.** *прям., перен.* телдән ҡалыу (яҙыу), тел көрмәлеү (бәйләнеү); **неме́ть от стра́ха** ҡурҡыштан телдән яҙыу **2.** (*терять чувствительность*) ойоу; **па́льцы неме́ют от хо́лода** һыуыҡтан бармаҡтар ойой

**НЕМЕ́ЦКИЙ,** -ая, -ое немец ...ы; **неме́цкий язы́к** немец теле

**НЕМИГА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** ҡатып ҡалған, текәлгән, төбәлгән; **немига́ющий взгляд** ҡатып ҡалған ҡараш **2.** емелдәмәгән, емелдәмәй торған; **немига́ющие огни́** емелдәмәгән уттар

**НЕМИЛОСЕ́РДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*жестокий*) аяуһыҙ, рәхимһеҙ, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ, ҡанһыҙ; **немилосе́рдный посту́пок** рәхимһеҙ ҡылыҡ **2.** *перен., разг.* (*чрезвычайный по силе*

*проявления*) сиктән тыш, саманан тыш, үтә, бик көслө

**НЕМИ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* яратмаған, күңелгә оҡшамаған, күңелгә ятмаған; **неми́лый челове́к** күңелгә оҡшамаған кеше

**НЕМИНУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое ҡотолғоһоҙ; **немину́емая встре́ча** ҡотолғоһоҙ осрашыу

**НЕМНО́ГИЙ,** -ая, -ое **1.** ҡайһы бер, бер аҙ, аҙыраҡ, бер нисә; **в немно́гих стра́нах** ҡайһы бер илдәрҙә **2.** *в знач. сущ.* **немно́гие** *мн.* (*о людях*) ҡайһы берәүҙәр, айырым кешеләр (генә) **3.** *в знач. сущ.* **немно́гое** *с* әҙ-мәҙ; **забы́л то немно́гое, что знал** әҙ-мәҙ белгәнен дә онотҡан **4.** аҙ ғына, бер аҙ; **немно́гим бо́льше** аҙ ғына күберәк; **немно́гим ста́рше** аҙ ғына өлкәнерәк ♦ **за немно́гим де́ло ста́ло** күп тырышлыҡ та кәрәкмәй

**НЕМНО́ГО** *нареч.* бер аҙ, аҙ-маҙ, аҙыраҡ, аҙ ғына, саҡ ҡына, остоҡ ҡына, күп түгел; **немно́го отдохну́ть** бер аҙ ял итеп алыу; **рабо́ты у нас немно́го** эшебеҙ күп түгел; **он немно́го моло́же меня́** ул минән саҡ ҡына йәшерәк

**НЕМНОГОСЛО́ВНОСТЬ** *ж* аҙ (ҡыҫҡа) һүҙлелек, ҡыҫҡалыҡ; **немногосло́вность отве́та** яуаптың ҡыҫҡалығы

**НЕМНОГОСЛО́ВНЫЙ,** -ая, -ое аҙ (ҡыҫҡа) һүҙле; **немногосло́вный челове́к** аҙ һүҙле кеше

**НЕМНОГОЧИ́СЛЕННОСТЬ** *ж* аҙ һанлы (булыу), аҙ һанлылыҡ; **немногочи́сленность коллекти́ва** аҙ һанлы халыҡ

**НЕМНО́ЖКО** *нареч.*; *разг. см.* **немно́го**

**НЕМО́Й,** -ая, -ое **1.** телһеҙ; **немо́й от рожде́ния** тыумыштан телһеҙ **2.** *в знач. сущ.* **немо́й** *м* и **нема́я** *ж* телһеҙ кеше **3.** *перен.* тын, тыныс, тып-тын, тулы; **нема́я ночь** тып-тын төн; **нема́я тишина́** тулы тынлыҡ **4.** (*безмолвный*) өнһөҙ, һүҙһеҙ, эске, йәшерен; **немо́й вопро́с** өнһөҙ һорау ♦ **нема́я ка́рта** һуҡыр карта (яҙыуһыҙ карта); **нема́я сце́на** һүҙһеҙ күренеш; **немо́й фильм (кино́)** тауышһыҙ кино; **нем (немо́й) как моги́ла (ры́ба)** сер һыя (тота) торған кеше

**НЕМОЛОДО́Й,** -ая, -ое урта йәштәге (йәштәрҙәге), йәш түгел (булмаған); **немолода́я же́нщина** урта йәштәрҙәге ҡатын

**НЕМО́ЛЧНЫЙ,** -ая, -ое *трад.-поэт. см.* **неумолка́емый**

**НЕМОТА́** *ж* телһеҙлек; **врождённая немота́** тыумыштан телһеҙлек

**НЕ́МОЩНОСТЬ** *ж* хәлһеҙлек, көсһөҙлөк, кәрһеҙлек, ҡарыуһыҙлыҡ, сирлелек; **не́мощность те́ла** тәндең хәлһеҙлеге

**НЕ́МОЩНЫЙ,** -ая, -ое хәлһеҙ, көсһөҙ, кәрһеҙ, ҡарыуһыҙ, сирле; **не́мощный стари́к** кәрһеҙ ҡарт; **не́мощный стон** көсһөҙ ыңғыраш

**НЕ́МОЩЬ** *ж*; *разг.* үтә хәлһеҙлек, бөтөрөнгәнлек, ауырыу, сир; **ста́рческая не́мощь** ҡартлыҡ сире

**НЕМУДРЕНО́** *в знач. сказ.*; *разг.* бик еңел, анһат, ғәжәпләнерлек түгел; **немудрено́ и заболе́ть** ауырып китеүе лә мөмкин (бик еңел)

**НЕМУДРЁНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ябай, еңел, аңлайышлы, бер ҡатлы; **немудрёная зада́ча** еңел мәсьәлә; **немудрёный челове́к** бер ҡатлы кеше

**НЕМУЗЫКА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое моңһоҙ, музыкаға һәләте булмаған; **немузыка́льный челове́к** моңһоҙ кеше

**НЕ́МЦЫ** *мн.* немецтар, немец халҡы // *ед.* **не́мец** *м* немец ир-аты; **не́мка** *ж* немец ҡатын-ҡыҙы

**НЕМЫ́СЛИМЫЙ,** -ая, -ое аҡылға һыймаҫлыҡ, кеше ышанмаҫлыҡ, күҙ алдына килтермәҫлек; **немы́слимые усло́вия** аҡылға һыймаҫлыҡ шарттар

**НЕНАВИ́ДЕТЬ** *несов. кого-что* күрә алмау, ене (йәне) һөймәү (яратмау), дошман күреү; **ненави́деть врага́** дошманды күрә алмау

**НЕНАВИ́ДЯЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **ненави́деть 2.** *прил.* күрә алмаусан; **ненави́дящий взгляд** күрә алмаусан ҡараш

**НЕНАВИ́СТНИК** *м* и **НЕНАВИ́СТНИЦА** *ж* күрә алмаусы, дошман күреүсе

**НЕНАВИ́СТНИЧЕСТВО** *с* күрә алмау(сылыҡ), дошманлыҡ

**НЕНАВИ́СТНЫЙ,** -ая, -ое яуыз, нәфрәтле, ерәндергес; **ненави́стный враг** яуыз дошман; **ненави́стный взгляд** нәфрәтле ҡараш

**НЕ́НАВИСТЬ** *ж* нәфрәт, күрә алмау(сылыҡ), дошманлыҡ, яуызлыҡ; **не́нависть к притесни́телям** йәберләүселәргә нәфрәт

**НЕНАВЯ́ЗЧИВЫЙ,** -ая, -ое бәйләнсек (йөҙәткес, ялҡытҡыс) булмаған; **ненавя́зчивый челове́к** бәйләнсек булмаған кеше

**НЕНАГЛЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое (*любимый, дорогой*) һөйөклө, ҡәҙерле; **ненагля́дное дитя́** ҡәҙерле бала

**НЕНАДЁЖНОСТЬ** *ж* инабатһыҙлыҡ, ышанысһыҙлыҡ; **ненадёжность укрепле́ний** нығытмаларҙың ышанысһыҙлығы

**НЕНАДЁЖНЫЙ,** -ая, -ое ышанысһыҙ, инабатһыҙ, ышанысы аҙ булған; **ненадёжные све́дения** ышанысһыҙ мәғлүмәттәр

**НЕНА́ДОБНОСТЬ** *ж* кәрәкһеҙлек, кәрәге юҡлыҡ (булмау), кәрәкһеҙ булыу; **за нена́добностью** кәрәге булмау сәбәпле

**НЕНАДО́ЛГО** *нареч.* аҙ ғына ваҡытҡа, ҡыҫҡа ваҡытҡа, оҙаҡҡа түгел; **ненадо́лго отлучи́ться** аҙ ғына ваҡытҡа сығып тороу

**НЕНАКАЗУ́ЕМОСТЬ** *ж*; *юр.* яза бирелергә тейеш булмау; **ненаказу́емость посту́пка** ҡылған эш өсөн яза бирелергә тейеш булмау

**НЕНАКАЗУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *юр.* яза бирелергә тейеш булмаған; **ненаказу́емый посту́пок** яза бирелергә тейеш булмаған эш-ҡылыҡ

**НЕНАЛА́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое юлға һалынмаған, насар ойошторолған; **нена́лаженный быт** насар ойошторолған көнкүреш

**НЕНАМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое *см.* **непредна-ме́ренный**

**НЕНАМНО́ГО** *нареч.*; *разг.* аҙ ғына, бик аҙға ғына; **ненамно́го отстава́ть от други́х** башҡаларҙан аҙ ғына артҡа ҡалыу

**НЕНАПАДЕ́НИЕ** *с* һөжүм итмәү; **догово́р о ненападе́нии** һөжүм итмәү тураһында килешеү

**НЕНАРО́КОМ** *нареч.*; *разг.* яңылыш, яңылышлыҡ менән, осраҡлы рәүештә, юрый (үс итеп) түгел; **ненаро́ком разби́ть ча́шку** яңылыш сынаяҡты ватыу

**НЕНАРО́ЧНО** *нареч.*; *разг. см.* **ненаро́ком**

**НЕНАРУШИ́МОСТЬ** *ж* боҙолмаҫ(лыҡ) (ҡаҡшамаҫ) булыу; **ненаруши́мость кля́твы** анттың боҙолмаҫ булыуы

**НЕНАРУШИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙгәртелмәҫ, боҙолмаҫ, ҡаҡшамаҫ; **ненаруши́мое обеща́ние** боҙолмаҫ вәғәҙә **2.** боҙолмай торған, тулы; **ненаруши́мая тишина́** тулы тынлыҡ

**НЕНА́СТНЫЙ,** -ая, -ое ямғырлы, йонсоу; **нена́стный день** йонсоу көн

**НЕНАСТОЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** яһалма; **ненастоя́щий зуб** яһалма теш **2.** ялған, ысын булмаған; **ненастоя́щая дру́жба** ялған дуҫлыҡ

**НЕНА́СТЬЕ** *с* йонсоу (ебеткәк, епшек, ямғырлы) көн, ынйыҡ; **осе́ннее нена́стье** көҙгө йонсоу көн(дәр)

**НЕНАСЫ́ТНОСТЬ** *ж* ҡомһоҙлоҡ, туймаҫ булыу, туймаҫ тамаҡ булыу

**НЕНАСЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡомһоҙ, туймаҫ, һис тә ҡәнәғәтләнмәҫ, ҡәнәғәтһеҙ; **ненасы́тный зверь** һис тә ҡәнәғәтләнмәҫ йыртҡыс хайуан

**НЕНАТУРА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яһалма, ысын (тәбиғи) булмаған; **ненатура́льный же́мчуг** яһалма ынйы

**НЕ́НЕЦКИЙ,** -ая, -ое ненец ...ы; **не́нецкий язы́к** ненец теле

**НЕНОРМА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** (*отклонение от нормы*) нормаль булмау (булмағанлыҡ, түгеллек), аҡылға зәғифлек, аҡылдан яҙғанлыҡ; **психи́ческая ненорма́льность** психик яҡтан нормаль булмау **2.** нормаль булмаған хәл (күренеш); **ненорма́льности в жи́зни** тормоштағы нормаль булмаған күренештәр

**НЕНО́ШЕНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* кейелмәгән, яңы; **нено́шеное пла́тье** кейелмәгән күлдәк

**НЕНУ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое кәрәкһеҙ, кәрәкмәгән, кәрәк булмаған, артыҡ; **нену́жная тра́та де́нег** кәрәкһеҙгә аҡса туҙҙырыу

**НЕ́НЦЫ** *мн.* ненецтар, ненец халҡы // *ед.* **не́нец** *м* ненец ир-аты; **не́нка** *ж* ненец ҡатын-ҡыҙы

**НЕОБДУ́МАННО** *нареч.* уйламайынса, уйлап-нитеп тормайынса, уйлап еткермәйенсә; **сказа́ть об э́том необду́манно** был турала уйлап еткермәйенсә әйтеү

**НЕОБДУ́МАННОСТЬ** *ж* уйлан(ыл)маған-лыҡ, уйлап еткер(ел)мәгәнлек, уйлап еткер(ел)мәгән булыу; **необду́манность реше́ния** ҡарарҙың уйлап еткерелмәгән булыуы

**НЕОБДУ́МАННЫЙ,** -ая, -ое уйлан(ыл)маған, уйламай ҡылынған, уйлап еткер(ел)мәгән; **необду́манный посту́пок** уйламай ҡылынған ҡылыҡ

**НЕОБЕСПЕ́ЧЕННОСТЬ** *ж* **1.** тәьмин ителмәгән булыу (ителмәгәнлек); **необеспе́ченность стройматериа́лами** төҙөлөш материалдары менән тәьмин ителмәгәнлек **2.** етешһеҙлек, мохтажлыҡ; **необеспе́ченность деньга́ми** аҡсаға мохтажлыҡ

**НЕОБЕСПЕ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәьмин ителмәгән; **необеспе́ченный рабо́той уча́сток** эш менән тәьмин ителмәгән участка **2.** етешһеҙ, ярлы, мохтаж; **необеспе́ченные лю́ди** ярлы кешеләр

**НЕОБЖИТО́Й** и **НЕОБЖИ́ТЫЙ,** -ая, -ое кеше йәшәмәгән (тормаған); **необжита́я кварти́ра** кеше йәшәмәгән фатир

**НЕОБИТА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое кеше йәшәмәй торған, кешеһеҙ, кеше аяғы баҫмаған; **необита́емый о́стров** кеше аяғы баҫмаған утрау

**НЕОБОЗРИ́МОСТЬ** *ж* киңлек, иге-сиге булмау, икһеҙ-сикһеҙлек, осһоҙ-ҡырыйһыҙ булыу, күҙ күреме етмәҫлек; **необозри́мость мо́ря** диңгеҙҙең икһеҙ-сикһеҙлеге

**НЕОБОЗРИ́МЫЙ,** -ая, -ое икһеҙ-сикһеҙ, иге-сиге булмаған, күҙ күреме еткеһеҙ; **необозри́мые поля́** иге-сиге булмаған яландар

**НЕОБОСНО́ВАННОСТЬ** *ж* нигеҙһеҙлек, нигеҙләнмәгән булыу; **необосно́ванность вы́водов** һығымталарҙың нигеҙләнмәгән булыуы

**НЕОБОСНО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое нигеҙһеҙ, нигеҙләнмәгән; **необосно́ванное обвине́ние** нигеҙләнмәгән ғәйепләү

**НЕОБРАБО́ТАННОСТЬ** *ж* эшкәртелмәгәнлек, эшкәртелмәгән булыу; **необрабо́танность ко́жи** тиренең эшкәртелмәгәнлеге

**НЕОБРАБО́ТАННЫЙ,** -ая, -ое эшкәртелмәгән; **необрабо́танные зе́мли** эшкәртелмәгән ерҙәр

**НЕОБРАЗО́ВАННОСТЬ** *ж* белемһеҙлек, наҙанлыҡ, белемһеҙ (уҡымаған, наҙан) булыу

**НЕОБРАЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое белемһеҙ, уҡымаған, наҙан; **необразо́ванные лю́ди** наҙан кешеләр

**НЕОБРАТИ́МОСТЬ** *ж* ҡотолғоһоҙлоҡ, ҡотолғоһоҙ булыу, ҡабатланмай торған; **необрати́мость разлу́ки** айырылышыуҙың ҡотолғоһоҙ булыуы

**НЕОБРАТИ́МЫЙ,** -ая, -ое ҡотолғоһоҙ, кире ҡайтмаҫ, ҡабатланмаҫ; **необрати́мый проце́сс** ҡотолғоһоҙ процесс

**НЕОБРЕМЕНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое еңел, ҡыйын булмаған (түгел); **необремени́тельная про́сьба** ҡыйын булмаған үтенес

**НЕОБСТРЕ́ЛЯННЫЙ,** -ая, -ое **1.** һуғышта булмаған, һуғышҡа инмәгән, дары еҫе еҫкәмәгән, ут аҫтында булмаған; **необстре́лянный солда́т** һуғышҡа инмәгән һалдат **2.** *перен.* (*неопытный*) тәжрибәһеҙ, донъя күрмәгән, донъяның әсе-һен-сөсөһөн татымаған

**НЕОБУ́ЗДАННОСТЬ** *ж* йүгәнһеҙлек, теҙгенһеҙлек, тотанаҡһыҙлыҡ; **необу́зданность нра́ва** холоҡтоң тотанаҡһыҙлығы

**НЕОБУ́ЗДАННЫЙ,** -ая, -ое йүгәнһеҙ, теҙгенһеҙ, тотанаҡһыҙ; **необу́зданный челове́к** тотанаҡһыҙ әҙәм

**НЕОБХОДИ́МО 1.** *нареч.* мотлаҡ; **коли́чество необходи́мо перехо́дит в ка́чество** һан мотлаҡ сифатҡа күсә **2.** *в знач. сказ., с неопр.* кәрәк, тейеш, мотлаҡ, зарур; **необходи́мо приня́ть ме́ры** саралар күрергә кәрәк

**НЕОБХОДИ́МОСТЬ** *ж* **1.** (*надобность*) кәрәклек, кәрәкле булыу, хәжәт; **в слу́чае кра́йней необходи́мости** үтә ныҡ кәрәк булған осраҡта **2.** *филос.* зарурлыҡ

**НЕОБХОДИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*очень нужный*) үтә кәрәкле; **необходи́мые све́дения** үтә кәрәкле мәғлүмәттәр **2.** (*обязательный*) ҡотолғоһоҙ, мотлаҡ, мәжбүри, тейешле; **приня́ть необходи́мые ме́ры** тейешле саралар күреү **3.** *филос.* зарурат

**НЕОБЩИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* аралашмаусанлыҡ, аралашмаусан булыу, ҡырағайлыҡ; **отлича́ться необщи́тельностью** аралашмаусан булыу менән айырылып тороу

**НЕОБЩИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аралашмаусан, ҡырағай; **необщи́тельный челове́к** аралашмаусан кеше; **необщи́тельный хара́ктер** ҡырағай холоҡ

**НЕОБЪЕ́ЗЖЕННЫЙ,** -ая, -ое (*о лошади*) аҫау; **необъе́зженный жеребе́ц** аҫау айғыр

**НЕОБЪЕКТИ́ВНО** *нареч.* ғәҙел -мау/-мәү; **суди́ть необъекти́вно** ғәҙел хөкөм итмәү

**НЕОБЪЕКТИ́ВНОСТЬ** *ж* ғәҙелһеҙлек, ғәҙел булмау; **необъекти́вность оце́нки** баһаның ғәҙел булмауы

**НЕОБЪЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое ғәҙел булмаған; **необъекти́вная кри́тика** ғәҙел булмаған тәнҡит

**НЕОБЪЯСНИ́МЫЙ,** -ая, -ое аңлатып (биреүе мөмкин) булмаған, аңлата алмаҫлыҡ; **необъясни́мое явле́ние** аңлата алмаҫлыҡ күренеш

**НЕОБЪЯ́ТНОСТЬ** *ж* киң булыу, иге-сиге булмау, икһеҙ-сикһеҙлек, ҡолас етмәҫлек булыу; **необъя́тность лесо́в** урмандарҙың икһеҙ-сикһеҙлеге

**НЕОБЪЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое икһеҙ-сикһеҙ, иге-сиге булмаған, сикһеҙ (хисапһыҙ) киң; **необъя́тные просто́ры** икһеҙ-сикһеҙ киңлектәр

**НЕОБЫКНОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*незаурядный, чрезвычайный*) ғәҙәттән тыш көслө, оҡшаш булмаған, башҡаларҙыҡы һымаҡ түгел, айырылып торған **2.** (*необычный*) ғәжәп, аптырарлыҡ, ҡыҙыҡ, сәйер; **необыкнове́нный слу́чай** ғәжәп бер ваҡиға

**НЕОБЫЧА́ЙНОСТЬ** *ж* ғәҙәттән тыш булыу, үҙенә башҡа (бер төрлө) булыу; **необыча́йность явле́ния** күренештең ғәҙәттән тыш булыуы

**НЕОБЫЧА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **необыкнове́нный** 1

**НЕОБЫ́ЧНОСТЬ** *ж* ғәҙәти булмау, ғәҙәттән тыш булыу, күнегелмәгәнлек, күнегелмәгән булыу; **необы́чность обстано́вки** хәлдең ғәҙәти булмауы

**НЕОБЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое үҙенсәлекле, ғәҙәти булмаған, ғәҙәттән тыш, күнегелмәгән; **необы́чный отве́т** ғәҙәти булмаған яуап

**НЕОБЯЗА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* мәжбүри булмау, вәғәҙәлә тормаусанлыҡ, илтифатһыҙлыҡ, иғтибарһыҙлыҡ; **необяза́тельность прихо́да на собра́ние** йыйылышҡа килеүҙең мәжбүри булмауы

**НЕОБЯЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мәжбүри (мотлаҡ) булмаған; **необяза́тельная рабо́та** мәжбүри булмаған эш; **необяза́тельный уче́бный предме́т** өйрәнеү өсөн мәжбүри булмаған фән **2.** вәғәҙәһендә тормаусан, иғтибарһыҙ, илтифатһыҙ; **необяза́тельный челове́к** вәғәҙәһендә тормаусан (ышанысһыҙ) кеше

**НЕОГЛЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *книжн. см.* **необозри́мый**

**НЕОГРАНИ́ЧЕННОСТЬ** *ж* сикләнмәгәнлек, сикләнмәгән булыу; **неограни́ченность вла́сти** властың сикләнмәгән булыуы

**НЕОГРАНИ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое сикләнмәгән, бик ҙур; **неограни́ченные полномо́чия** сикләнмәгән хоҡуҡтар; **неограни́ченные возмо́жности** бик ҙур мөмкинселектәр

**НЕОДИНА́КОВЫЙ,** -ая, -ое бер төрлө (берҙәй оҡшаш) булмаған; **неодина́ковые хара́ктеры** берҙәй оҡшаш булмаған холоҡтар

**НЕОДНОКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое бер нисә тапҡыр (рәт, мәртәбә) ҡабатланған (әйтелгән, яһалған), ҡат-ҡат -ған/-гән; **неоднокра́тные предупрежде́ния** бер нисә тапҡыр әйтелгән иҫкәртеүҙәр

**НЕОДНОРО́ДНОСТЬ** *ж* төрлөлөк, оҡшаш булмау; **неодноро́дность при́знаков** сифаттарҙың (билгеләрҙең) оҡшаш булмауы

**НЕОДНОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** оҡшаш булмаған, төрлө-төрлө булған; **неодноро́дные явле́ния** оҡшаш булмаған күренештәр **2.** (*несходный по составу*) төрлө составлы; **неодноро́дная ма́сса** төрлө составлы масса

**НЕОДОБРЕ́НИЕ** *с* хупламау, хуп күрмәү, яраҡлы тип тапмау; **выража́ть неодобре́ние** хупламауҙы белдереү



22 зак. 2.0084.05

**НЕОДОБРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хупламаған, хуп күрмәгән, шелтәле, насар, тиҫкәре; **неодобри́тельная оце́нка** насар баһа; **неодобри́тельный взгляд** шелтәле ҡараш

**НЕОДОЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое еңелмәй торған, еңә алмаҫлыҡ, еңелмәҫ(лек), еңеп булмай торған; **неодоли́мая си́ла** еңә алмаҫлыҡ көс

**НЕОДУШЕВЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** йәнһеҙ, тере (йәне) булмаған; **неодушевлённая мате́рия** йәнһеҙ материя **2.** *грам.* йәнһеҙ

**НЕОЖИ́ДАННОСТЬ** *ж* **1.** көтөлмәгәнлек, көтөлмәгән булыу; **неожи́данность встре́чи** осрашыуҙың көтөлмәгәнлеге **2.** көтөлмәгән хәл (*ваҡиға һ.б.*); **вся́кие неожи́данности** төрлө көтөлмәгән хәлдәр

**НЕОЖИ́ДАННЫЙ,** -ая, -ое көтөлмәгән, ҡапыл -ған/-гән; **неожи́данный гость** көтөлмәгән ҡунаҡ; **неожи́данный ли́вень** ҡапыл килеп сыҡҡан ҡойма ямғыр

**НЕОКОНЧА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яңынан (ҡайтанан) ҡаралырға (эшләнергә, тикшерелергә) тейешле, һуңына (ахырына) еткерелмәгән, бөт(өл)мәгән; **неоконча́тельное реше́ние** яңынан хәл ителергә тейешле ҡарар

**НЕОКО́НЧЕННЫЙ,** -ая, -ое тамамланмаған, бөтмәгән, осланмаған; **неоко́нченная ша́хматная па́ртия** тамамланмаған шахмат партияһы

**НЕОЛИ́Т** *м*; *археол.* неолит (*таш быуаттың иң һуңғы осоро*)

**НЕОЛИТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *археол.* неолит ...ы, неолитик; **неолити́ческая эпо́ха** неолит дәүере

**НЕОЛОГИ́ЗМ** *м*; *лингв.* неологизм (*телдәге яңы һүҙ йәки һүҙбәйләнеш*)

**НЕО́Н** *м* неон (*химик элемент, газ*)

**НЕО́НОВЫЙ,** -ая, -ое неон ...ы; **нео́новый свет** неон яҡтылығы ♦ **нео́новая ла́мпа (тру́бка)** неон лампаһы (торбаһы)

**НЕОПА́СНЫЙ,** -ая, -ое зарарһыҙ, зыянһыҙ, ҡурҡынысһыҙ, ҡурҡыныс (зарарлы, зыянлы) булмаған; **неопа́сное путеше́ствие** ҡурҡынысһыҙ сәйәхәт; **неопа́сный зверь** зыянһыҙ кейек

**НЕОПЕРИ́ВШИЙСЯ,** -аяся, -ееся **1.** (*о птенце*) ҡанат(ы) сыҡмаған, ҡанатланмаған; **неопери́вшийся галчо́нок** ҡанатланмаған сәүкә балаһы **2.** *перен.*, *разг.* тәжрибәһеҙ, йәш, донъя күрмәгән; **неопери́вшийся ю́ноша** тәжрибәһеҙ үҫмер

**НЕОПИ́САННЫЙ,** -ая, -ое исемлеккә индерелмәгән (яҙылмаған); **неопи́санные це́нности** исемлеккә индерелмәгән ҡиммәтле нәмәләр

**НЕОПИСУ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое һөйләп (әйтеп, яҙып) бөтөргөһөҙ, һүҙ (тел) менән әйтеп бирерлек булмаған; **неопису́емая красота́** һөйләп бөтөргөһөҙ матурлыҡ **2.** иҫ киткес ҙур (көслө); **неопису́емая ра́дость** иҫ киткес ҙур шатлыҡ

**НЕОПЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое түләй алмаҫлыҡ, түләп булмаҫлыҡ (бөтөргөһөҙ); **неопла́тный долг** түләй алмаҫлыҡ бурыс

**НЕОПРА́ВДАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** нигеҙһеҙ, нигеҙләнмәгән; **неопра́вданный вы́вод** нигеҙһеҙ һығымта **2.** тейешһеҙ, урынһыҙ, аҡланмаған; **неопра́вданные затра́ты** урынһыҙ сығымдар

**НЕОПРЕДЕЛЁННОСТЬ** *ж* **1.** билдәһеҙлек, асыҡ булмағанлыҡ, аныҡ (асыҡ) булмау; **неопределённость отве́та** яуаптың аныҡ булмауы **2.** (*неопредёленное положение*) билдәһеҙ хәл; **жить в неопределённости** билдәһеҙ хәлдә йәшәү

**НЕОПРЕДЕЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*точно не установленный*) билдәһеҙ; **идти́ в неопределённом направле́нии** билдәһеҙ йүнәлештә барыу **2.** (*неотчётливый, уклончивый*) аныҡ (асыҡ) булмаған, билдәле булмаған, икеле; **неопределённый отве́т** асыҡ булмаған яуап ♦ **неопределённое местоиме́ние** *грам.* билдәһеҙлек алмашы; **неопределённая фо́рма глаго́ла** *грам.* уртаҡ ҡылым; **неопределённые уравне́ния** *мат.* билдәһеҙ тигеҙләмәләр

**НЕОПРЕДЕЛИ́МОСТЬ** *ж* билдәләй (аңлай) алмау, билдәләү мөмкин булмағанлыҡ; **неопредели́мость чувств** хистәрҙе билдәләй алмау

**НЕОПРЕДЕЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое билдәләү мөмкин булмаған, билдәләп булмаған; **неопредели́мый отте́нок** билдәләү мөмкин булмаған төҫмөр

**НЕОПРОВЕРЖИ́МОСТЬ** *ж* кире ҡағып булмағанлыҡ, инҡар ителмәҫлек; **неопровержи́мость доказа́тельств** дәлилдәрҙең инҡар ителмәҫлелеге

**НЕОПРОВЕРЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое кире ҡағып булмаҫлыҡ, кире ҡаҡҡыһыҙ, инҡар ителгеһеҙ; **неопровержи́мое мне́ние** кире ҡаҡҡыһыҙ фекер

**НЕОПРЯ́ТНОСТЬ** *ж* әрпешлек, һәпрәлек, шамтырлыҡ; **неопря́тность ребёнка** баланың әрпешлеге

**НЕОПРЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое әрпеш, һәпрә, шамтыр; **неопря́тный челове́к** шамтыр әҙәм

**НЕО́ПЫТНОСТЬ** *ж* тәжрибәһеҙлек, тәжрибә булмау; **нео́пытность ю́ноши** үҫмерҙең тәжрибәһеҙлеге

**НЕО́ПЫТНЫЙ,** -ая, -ое тәжрибәһеҙ, донъя күрмәгән; **нео́пытный специали́ст** тәжрибәһеҙ белгес

**НЕОРГАНИЗО́ВАННОСТЬ** *ж* ойошмағанлыҡ, тарҡаулыҡ, ойошмаған булыу (тарҡау); **неорганизо́ванность в рабо́те** эштәге тарҡаулыҡ

**НЕОРГАНИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое ойошмаған, тарҡау, йыйнаҡ (теүәл) булмаған; **неорганизо́ванный челове́к** йыйнаҡ булмаған кеше; **неорганизо́ванный коллекти́в** тарҡау коллектив

**НЕОРГАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое (*неживой*) тере (органик) булмаған; **неоргани́ческая приро́да** органик булмаған тәбиғәт; **неоргани́ческие удоб-**

**ре́ния** органик булмаған ашламалар ♦ **неоргани́ческая хи́мия** органик булмаған химия

**НЕОСВЕДОМЛЁННОСТЬ** *ж* белеп еткермәү, хәбәрҙар булмау, мәғлүмәтһеҙлек, мәғлүмәтһеҙ булыу; **неосведомлённость в о́бласти литерату́ры** әҙәбиәт өлкәһендә хәбәрҙар булмау

**НЕОСВЕДОМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое белмәгән, белмәй ҡалған, хәбәрҙар булмаған, мәғлүмәтһеҙ; **неосведомлённый в произво́дстве челове́к** производствоны белмәгән кеше

**НЕОСЛАБЕВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее и **НЕОСЛА́БНЫЙ,** -ая, -ое өҙлөкһөҙ, бер туҡтауһыҙ, даими, ныҡ, һүлпәнәймәй (бушамай, йомшармай, һүрелмәй) торған; **неослабева́ющий интере́с** һүрелмәй торған ҡыҙыҡһыныу; **неосла́бный контро́ль** даими күҙәтеү

**НЕОСМОТРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* уйламай (һаҡһыҙ) эш итеү, дыуамаллыҡ, һаҡһыҙлыҡ, алабарманлыҡ; **неосмотри́тельность в обраще́нии с огнём** ут менән һаҡһыҙ эш итеү

**НЕОСМОТРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое уйламай (һаҡһыҙ) эшләнгән (эшләүсе), һаҡһыҙ эшләнгән, алабарман; **неосмотри́тельный посту́пок** уйламай эшләнгән эш; **неосмотри́тельный челове́к** алабарман кеше

**НЕОСМЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое уйланылмаған, уйлап эшләнмәгән, аҡыл менән эшләнмәгән; **неосмы́сленное сло́во** уйланылмаған һүҙ

**НЕОСНОВА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* нигеҙһеҙлек; **неоснова́тельность до́водов** дәлилдәрҙең нигеҙһеҙлеге

**НЕОСНОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** нигеҙһеҙ; **неоснова́тельное обвине́ние** нигеҙһеҙ ғәйепләү (хөкөм) **2.** *разг.* елбәҙәк, еңел; **неоснова́тельный челове́к** елбәҙәк кеше

**НЕОСО́ЗНАННЫЙ,** -ая, -ое (*бессознательный, безотчётный*) аңһыҙ, аңһыҙлыҡ менән (ихтыярһыҙ) эшләнгән; **неосо́знанный посту́пок** аңһыҙ эшләнгән эш

**НЕОСПОРИ́МОСТЬ** *ж* бәхәсләшергә урын ҡалдырмау, бәхәсһеҙлек; **неоспори́мость доказа́тельств** дәлилдәрҙең бәхәсһеҙлеге

**НЕОСПОРИ́МЫЙ,** -ая, -ое бәхәсләшергә урын ҡалдырмай торған, бәхәсһеҙ, дәғүәһеҙ; **неоспори́мое преиму́щество** бәхәсһеҙ өҫтөнлөк

**НЕОСТОРО́ЖНОСТЬ** *ж* һаҡһыҙлыҡ, абайһыҙлыҡ; **допусти́ть неосторо́жность** һаҡһыҙлыҡ ҡылыу (эшләп ташлау)

**НЕОСТОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое һаҡһыҙ, абайламай, абайһыҙ; **неосторо́жный вы́стрел** абайһыҙ (абайламай) атыу; **неосторо́жное обраще́ние с огнём** ут менән һаҡһыҙ ҡыланыу

**НЕОСУЩЕСТВИ́МОСТЬ** *ж* тормошҡа (бойомға, эшкә) ашмаҫлыҡ (булыу); **неосуществи́мость пла́нов** пландарҙың тормошҡа ашмаҫлыҡ булыуы

**НЕОСУЩЕСТВИ́МЫЙ,** -ая, -ое тормошҡа (бойомға, эшкә) ашмаҫлыҡ (ашмаҫтай); **неосуществи́мое жела́ние** тормошҡа ашмаҫлыҡ теләк

**НЕОСЯЗА́ЕМОСТЬ** *ж* һиҙмәҫлек (һиҙелмәҫлек) булыу, тойолмаҫлыҡ, тойолмай торған булыу; **неосяза́емость результа́тов** һөҙөмтәләрҙең һиҙелмәҫлек булыуы

**НЕОСЯЗА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое тойолмаҫ, һиҙмәҫлек (һиҙелмәҫлек), һиҙелмәй (тойолмай) торған; **неосяза́емые измене́ния** һиҙелмәй торған үҙгәрештәр

**НЕОТВРАТИ́МОСТЬ** *ж* ҡотолғоһоҙлоҡ, ҡотолғоһоҙ булыу; **неотврати́мость разлу́ки** айырылышыуҙың ҡотолғоһоҙ булыуы

**НЕОТВРАТИ́МЫЙ,** -ая, -ое ҡотолғоһоҙ; **неотврати́мая опа́сность** ҡотолғоһоҙ хәүеф-хәтәр

**НЕОТВЯ́ЗНОСТЬ** *ж* баштан сыҡмау; **неотвя́зность мы́слей** уйҙарҙың баштан сыҡмауы

**НЕОТВЯ́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** баштан сыҡмай торған, йөҙәткес; **неотвя́зная ску́ка** йөҙәткес эс бошоу **2.** бәйләнсек, теңкә ҡороткос, йөҙәткес; **неотвя́зный челове́к** бәйләнсек кеше

**НЕОТДЕЛИ́МОСТЬ** *ж* айыр(ыл)ғыһыҙ (айырылмаҫлыҡ) булыу, бүленгеһеҙ (бүленмәҫлек) булыу, айырылыуы (бүленеүе) мөмкин булмау

**НЕОТДЕЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое (*обычно кратк. ф.*) айырылғыһыҙ, бүленгеһеҙ, айырылмай (бүленмәй) торған, айырып (бүлеп) алыу мөмкин түгел; **второ́й вопро́с неотдели́м от пе́рвого** икенсе һорауҙы беренсеһенән айырып алыу мөмкин түгел

**НЕОТЁСАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** юнылмаған, шымартылмаған; **неотёсанный ка́мень** шымартылмаған таш **2.** *перен.*, *разг.* тәрбиәһеҙ, тупаҫ; **неотёсанный челове́к** тупаҫ кеше

**НЕ́ОТКУДА** *нареч. с неопр.* урын (ер) юҡ; **госте́й ждать не́откуда** ҡунаҡ көтөр урын юҡ

**НЕОТЛАГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *см.* **неотло́жный**

**НЕОТЛО́ЖКА** *ж*; *прост.* ашығыс медицина ярҙамы

**НЕОТЛО́ЖНОСТЬ** *ж* кисектергеһеҙ булыу, кисектереүе мөмкин булмау; **неотло́жность де́ла** эштең кисектергеһеҙ булыуы

**НЕОТЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое кисектергеһеҙ, кисектерергә ярамай торған, ашығыс; **неотло́жный ремо́нт** кисектергеһеҙ ремонт ♦ **неотло́жная медици́нская по́мощь** ашығыс медицина ярҙамы

**НЕОТЛУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** айырылмаҫ, айырылмай (яндан китмәй) торған; **неотлу́чный спу́тник** айырылмаҫ юлдаш **2.** бер ҡайҙа китмәгән, китмәйенсә; **неотлу́чное дежу́рство** бер ҡайҙа китмәй дежурҙа тороу

**НЕОТРАЗИ́МОСТЬ** *ж* **1.** кире ҡағылмаҫлыҡ (ҡағылғыһыҙ) булыу; **неотрази́мость аргуме́нтов** дәлилдәрҙең кире ҡағылмаҫлыҡ булыуы **2.** *перен.* таң ҡалдырғыс (һоҡландырғыс) булыу; **не-**

**отрази́мость красоты́** матурлыҡтың таң ҡалдырғыс булыуы

**НЕОТРАЗИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡаршы торғоһоҙ, кире ҡаҡҡыһыҙ (ҡағылғыһыҙ, ҡағылмаҫлыҡ); **неотрази́мая ата́ка** ҡаршы торғоһоҙ һөжүм **2.** *перен.* таң ҡалдырғыс, һоҡландырғыс, бик көслө (ҙур); **неотрази́мое впечатле́ние** таң ҡалдырғыс тәьҫир

**НЕОТРЫ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **неотдели́мый** **2.** өҙлөкһөҙ, бер туҡтауһыҙ; **неотры́вное наблюде́ние** бер туҡтауһыҙ күҙәтеү

**НЕОТСТУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ныҡышмалы, өҙлөкһөҙ, бер туҡтауһыҙ, тайпылышһыҙ; **неотсту́пное пресле́дование зве́ря** йәнлекте бер туҡтауһыҙ эҙәрләү **2.** *см.* **неотвя́зный**

**НЕОТЧЁТЛИВОСТЬ** *ж* асыҡ (аныҡ) булмау, тоноҡ булыу, тоноҡлоҡ; **неотчётливость рису́нка** һүрәттең тоноҡлоғо

**НЕОТЧЁТЛИВЫЙ,** -ая, -ое асыҡ (аныҡ) булмаған, тоноҡ; **неотчётливое произноше́ние** аныҡ булмаған әйтелеш

**НЕОТЧУЖДА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *юр.* тартып алынмай торған; **неотчужда́емые дохо́ды** тартып алынмай торған килемдәр

**НЕОТЪЕ́МЛЕМЫЙ,** -ая, -ое айырып (тартып) алғыһыҙ, айырып (тартып) алынмай торған; **неотъе́млемая часть** тартып алынмай торған өлөш; **неотъе́млемое сво́йство** айырып алғыһыҙ һыҙат

**НЕОФИЦИА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое рәсми булмаған; **неофициа́льное обраще́ние** рәсми булмаған өндәшеү

**НЕОХВА́ТНЫЙ,** -ая, -ое ҡолас етмәҫлек (ҙур, киң), күҙ етмәҫлек (ҙур, киң), иҫкһеҙ-сикһеҙ ҙур (киң, йәйенке); **неохва́тные поля́** күҙ етмәҫлек киң яландар

**НЕОХО́ТА** *ж* **1.** (*нежелание*) теләмәү, теләр-теләмәҫ (кенә); **рабо́ту выполня́ть с неохо́той** эште теләр-теләмәҫ эшләү **2.** *кому* и *с неопр. в знач. сказ.*; *разг.* -ға/-гә теләк юҡ, -ҡы/-ке килмәү; **неохо́та разгова́ривать** һөйләшке килмәй; **неохо́та встреча́ться** осрашырға теләк юҡ

**НЕОХО́ТНО** *нареч.* теләмәй (генә), теләр-теләмәҫ; **неохо́тно исполня́ть про́сьбу** үтенесте теләр-теләмәҫ башҡарыу

**НЕОХО́ТНЫЙ,** -ая, -ое теләкһеҙ, теләмәгәнде (теләмәүҙе) белдергән

**НЕОЦЕНИ́МЫЙ,** -ая, -ое баһалап бөтөргөһөҙ, баһалағыһыҙ, үтә ҡиммәтле (ҙур, мөһим, әһәмиәтле); **неоцени́мые ка́чества** үтә ҡиммәтле сифаттар

**НЕОЩУТИ́МЫЙ,** -ая, -ое һиҙелмәҫлек, тойолмаҫлыҡ, бик бәләкәй; **неощути́мая поте́ря** бик бәләкәй юғалтыу

**НЕПА́ЛЬЦЫ** *мн.* непалдар, непал халҡы // *ед.* **непа́лец** *м* непал ир-аты; **непа́лка** *ж* непал ҡатын-ҡыҙы

**НЕПАРНОКОПЫ́ТНЫЕ** *мн.*; *зоол.* йомро тояҡлылар

**НЕПА́РНЫЙ,** -ая, -ое һыңар, ишһеҙ, ҡушһыҙ; **непа́рная о́бувь** һыңар аяҡ кейеме

**НЕПАРТИ́ЙНОСТЬ** *ж* партияһыҙлыҡ, фирҡәһеҙлек

**НЕПАРТИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое партияһыҙ, фирҡәһеҙ; **неparти́йные лю́ди** фирҡәһеҙ кешеләр

**НЕПЕДАГОГИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое педагогика ҡағиҙәләренә (талаптарына) тура килмәй торған (буйһонмаған); **непедагоги́чный посту́пок** педагогика талаптарына буйһонмаған ҡыланыш

**НЕПЕРЕВОДИ́МЫЙ,** -ая, -ое тәржемә ителмәй (итеп булмай) торған; **непереводи́мое выраже́ние** тәржемә итеп булмай торған әйтем

**НЕПЕРЕДАВА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое һүҙ менән аңлатып бирә алмаҫлыҡ, һөйләп биргеһеҙ (бирә алмаҫлыҡ), аңлата алмаҫлыҡ

**НЕПЕРЕНОСИ́МЫЙ,** -ая, -ое түҙә алмаҫлыҡ, түҙеп торғоһоҙ, сыҙағыһыҙ; **непереноси́мая боль** түҙеп торғоһоҙ ауыртыу

**НЕПЕРЕХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* күсемһеҙ; **неперехо́дный глаго́л** күсемһеҙ ҡылым

**НЕПЕЧА́ТНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*непристойный — о словах, брани*) тупаҫ, әшәке, оятһыҙ; **непеча́тные слова́** әшәке һүҙҙәр

**НЕПИ́САНЫЙ,** -ая, -ое рәсми яҙылмаған, ғөрөф-ғәҙәт (йола) буйынса килгән; **непи́саный зако́н** йола ҡанундары, яҙылмаған ҡанундар

**НЕПЛАТЁЖ** *м* түләмәү; **неплатёж за жильё** торлаҡ өсөн (аҡса) түләмәү

**НЕПЛАТЁЖЕСПОСО́БНОСТЬ** *ж*; *фин.* түләргә һәләтһеҙлек (хәленән килмәгәнлек); **неплатёжеспосо́бность зака́зчиков** заказ биреүселәрҙең түләргә һәләтһеҙлеге

**НЕПЛАТЁЖЕСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое *фин.* түләргә һәләтһеҙ, түләргә хәленән (көсөнән) килмәгән; **неплатёжеспосо́бные ли́ца** түләргә һәләтһеҙ кешеләр

**НЕПЛАТЕ́ЛЬЩИК** *м* бурысын түләмәүсе; **зло́стный неплате́льщик** уҫал уй менән бурысын түләмәүсе

**НЕПЛОДОРО́ДНОСТЬ** *ж* уңдырышһыҙлыҡ; **неплодоро́дность земе́ль** ерҙәрҙең уңдырышһыҙлығы

**НЕПЛОДОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое уңдырышһыҙ; **неплодоро́дный уча́сток** уңдырышһыҙ участка

**НЕПЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һирәк; **непло́тные же́рди забо́ра** һирәк итеп тотолған ҡойма, һайғау; **непло́тные облака́** һирәк болоттар **2.** беше булмаған; **непло́тная ткань** беше булмаған туҡыма

**НЕПЛОХО́Й,** -ая, -ое насар түгел, арыу (яҡшы) ғына, ҡәнәғәтләнерлек; **неплохо́й отве́т** ҡәнәғәтләнерлек яуап

**НЕПОБЕДИ́МОСТЬ** *ж* еңелмәҫлек, еңелмәҫ булыу

**НЕПОБЕДИ́МЫЙ,** -ая, -ое еңелмәç, еңелмәй торған, еңелгеһеҙ; **непобеди́мая а́рмия** еңелмәç ғәскәр (армия)

**НЕПОВИ́ННЫЙ,** -ая, -ое ғәйепһеҙ, гөнаһһыҙ; **при́знан непови́нным** ғәйепһеҙ тип танылған

**НЕПОВИНОВЕ́НИЕ** *с* буйһонмау, баш эймәү (бирмәү), тыңламау; **неповинове́ние вла́сти** власҡа буйһонмау

**НЕПОВОРО́ТЛИВОСТЬ** *ж* аҡрын ҡуҙғалыусанлыҡ, һүлпәнлек; **неповоро́тливость ума́** аҡылдың һүлпәнлеге

**НЕПОВОРО́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое ауыр (аҡрын) ҡуҙғалыусан, нәкәç, һүлпән; **неповоро́тливый челове́к** аҡрын ҡуҙғалыусан кеше

**НЕПОВТОРИ́МОСТЬ** *ж* тиңһеҙ (ҡабатланмаç) булыу, оҡшашы (тиңе) булмау, ҡабатлауы мөмкин булмау; **неповтори́мость пре́жних дней** үткән көндәрҙең ҡабатланмаç булыуы

**НЕПОВТОРИ́МЫЙ** и **НЕПОВТОРЯ́ЕМЫЙ,** -ая, -ое үҙенә бер төрлө, оҡшашы-тиңе булмаған, ҡабатланмаç, ҡабатлауы (ҡабатланыуы) мөмкин булмаған; **неповтори́мая красота́** оҡшашы-тиңе булмаған гүзәллек

**НЕПОГО́ДА** *ж* йонсоу (боҙоҡ) көн(дәр), елле-ямғырлы (елле-буранлы) көн(дәр); **осе́нняя непого́да** көҙгө йонсоу көндәр

**НЕПОГО́ЖИЙ,** -ая, -ее *разг.* йонсоу, болотло; **непого́жие дни** йонсоу көндәр

**НЕПОГРЕШИ́МОСТЬ** *ж* яңылышмау(санлыҡ), хаталанмау(санлыҡ), яңылышмай (хаталанмай) торған булыу

**НЕПОГРЕШИ́МЫЙ,** -ая, -ое яңылышмай (хаталанмай, шик тыуҙырмай) торған, һис шикһеҙ дөрөç; **непогреши́мый результа́т** һис шикһеҙ дөрөç һөҙөмтә

**НЕПОДАЛЁКУ** *нареч.* алыç түгел, яҡында, яҡын тирәлә, ошо тирәлә (генә); **неподалёку видне́ется лес** яҡында (ғына) урман күренә

**НЕПОДА́ТЛИВОСТЬ** *ж* **1.** эшкәртеүгә (ыңғайға) килмәү, ҡыйынлыҡ менән эшкәртелеү; **непода́тливость ста́ли** ҡоростоң ҡыйынлыҡ менән эшкәртелеүе **2.** *перен.* ыҡҡа (яйға, ипкә) килмәү, үҙ һүҙлелек

**НЕПОДА́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** эшкәртеүгә килмәү, ҡыйынлыҡ менән эшкәртелә торған; **непода́тливый ка́мень** ҡыйынлыҡ менән эшкәртелә торған таш **2.** *перен.* (*неуступчивый*) ыҡҡа (яйға, ипкә) килмәгән, үҙ һүҙле, еңмеш; **непода́тливый челове́к** үҙ һүҙле кеше

**НЕПОДВЕ́ДОМСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое -ға/-гә ҡарамаған (буйһонмаған), ҡарамағында булмаған; **неподве́домственные заво́ду дома́** завод ҡарамағында булмаған йорттар

**НЕПОДВИ́ЖНОСТЬ** *ж* хәрәкәтһеҙлек, хәрәкәтһеҙ булыу; **стоя́ть в неподви́жности** хәрәкәтһеҙ баçып тороу

**НЕПОДВИ́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәрәкәтһеҙ, хәрәкәтләнмәү; **окружа́ющая приро́да ка́жется неподви́жной** тире-йүндәге тәбиғәт хәрәкәтһеҙ кеүек тойола **2.** (*медлительный — о человеке*) яй, ығыш, мыштыр, һүлпән; **неподви́жный челове́к** һүлпән кеше **3.** (*застывший — о взгляде, выражении лица и т.п.*) ҡатып ҡалған; **неподви́жное лицо́** ҡатып ҡалған йөҙ

**НЕПОДГОТО́ВЛЕННОСТЬ** *ж* әҙерлекһеҙлек, әҙерлекһеҙ булыу; **неподгото́вленность ученика́** уҡыусының әҙерлекһеҙлеге

**НЕПОДГОТО́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое әҙерлекһеҙ, әҙерләнмәгән; **неподгото́вленный специали́ст** әҙерлекһеҙ белгес; **неподгото́вленный докла́д** әҙерләнмәгән доклад

**НЕПОДДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*подлинный*) ысын, ялған түгел (булмаған); **неподде́льная по́дпись** ысын ҡултамға **2.** (*искренний*) эскерһеҙ, ысын күңелдән булған; **неподде́льная улы́бка** ысын күңелдән булған йылмайыу

**НЕПОДКУ́ПНОСТЬ** *ж* һатлыҡ булмау, һатылмаç булыу, һатылмаусан, намыçлылыҡ, тоғролоҡ; **неподку́пность судьи́** судьяның һатылмаç булыуы (һатылмаусанлығы)

**НЕПОДКУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое һатлыҡ түгел, һатылмаç, һатылмаусан, тоғро, намыçлы, ғәҙел; **неподку́пный челове́к** тоғро кеше

**НЕПОДОБА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее килешһеҙ, килешмәй торған, тейешһеҙ, яраҡһыҙ; **вести́ себя́ неподоба́ющим о́бразом** үҙенде килешһеҙ тотоу

**НЕПОДРАЖА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое оҡшашы (тиңдәше) булмаған, иç киткес (һәйбәт, шәп, яҡшы); **неподража́емый арти́ст** иç киткес шәп артист

**НЕПОДСУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое *юр.* судҡа бире(ле)рлек (бирелергә тейеш) булмаған, хөкөмгә тарттырырлыҡ булмаған, хөкөм ителергә тейеш булмаған; **э́то неподсу́дное де́ло** был судҡа бирелә торған эш түгел

**НЕПОДХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее яраҡһыҙ, уңайһыҙ, ҡулайһыҙ; **неподходя́щие усло́вия** уңайһыҙ шарттар

**НЕПОДЧИНЕ́НИЕ** *с* буйһонмау, баш эймәү (бирмәү), тыңламау; **неподчине́ние вла́сти** власҡа буйһонмау

**НЕПОЗВОЛИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ярамаçлыҡ (ярамай торған) булыу, юл ҡуйғыһыҙ (ҡуймаçлыҡ) булыу, юл ҡуйырға ярамай торған булыу

**НЕПОЗВОЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ярамаçлыҡ, ярамаған, юл ҡуйғыһыҙ (ҡуймаçлыҡ), юл ҡуйырға ярамағанлыҡ; **непозволи́тельный посту́пок** ярамаған ҡылыҡ

**НЕПОКЛА́ДИСТЫЙ,** -ая, -ое һүҙгә (ипкә) килмәүсән, үҙ һүҙенән ҡайтмаусан, үҙ һүҙле, еңмеш; **непокла́дистый челове́к** үҙ һүҙле кеше

**НЕПОКОЛЕБИ́МОСТЬ** *ж* икеләнмәүсәнлек, ныҡлыҡ, ныҡ тороусанлыҡ, ҡаҡшамаçлыҡ (ҡаҡшамаç) булыу; **прояви́ть непоколеби́мость** ныҡлыҡ күрһәтеү

**НЕПОКОЛЕБИ́МЫЙ,** -ая, -ое нык (тороусан), ҡаҡшамаç, ҡаҡшатылмаç; **непоколеби́мая дру́жба** ҡаҡшамаç дуçлыҡ

**НЕПОКО́РНОСТЬ** *ж* буйһонмау(санлыҡ), баш бирмәү(сәнлек); **непоко́рность ребёнка** баланың буйһонмауы

**НЕПОКО́РНЫЙ,** -ая, -ое буйһонмаусан, баш бирмәүсән (эймәүсән), тыңламаусан; **непоко́рный хара́ктер** буйһонмаусан холоҡ

**НЕПОКРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*незакрытый*) ҡапланмаған, түбәһеҙ, түбәһе ябылмаған; **но́вый непокры́тый дом** түбәһе ябылмаған яңы йорт **2.** *спец.* түләнмәй ҡалған; **непокры́тый креди́т** түләнмәй ҡалған бурыс

**НЕПОЛА́ДКИ** *мн.* (*ед.* **непола́дка** *ж*); *разг.* **1.** етешһеҙлектәр, кәмселектәр; **непола́дки в рабо́те** эштәге етешһеҙлектәр **2.** ыҙғыш-талаш, аңлашылмаусылыҡ; **семе́йные непола́дки** ғаиләләге аңлашылмаусылыҡтар

**НЕПОЛИВНО́Й,** -ая, -ое *с.-х.* һуғарылмай торған, һуғарыуһыҙ; **неполивны́е зе́мли** һуғарылмай торған ерҙәр

**НЕПОЛНОГЛА́СИЕ** *с*; *лингв.* һуҙынҡыларҙың кәмлеге, тулы булмауы (*иçке славян телендә тартынҡылар араһындағы "-ра", "-ла", "-ре", "-ле", мәç.*, **врата́**, **зла́то**, **брег**, **шлем**)

**НЕПОЛНОПРА́ВИЕ** *с* и **НЕПОЛНОПРА́ВНОСТЬ** *ж* тулы хоҡуҡлы булмау; **неполнопра́вие угнетённых наро́дов** иҙелгән халыҡтарҙың тулы хоҡуҡлы булмауы

**НЕПОЛНОПРА́ВНЫЙ,** -ая, -ое тулы хоҡуҡлы булмаған

**НЕПОЛНОТА́** *ж* тулы түгеллек, кәмлек; **неполнота́ све́дений** мәғлүмәттәрҙең тулы түгеллеге

**НЕПОЛНОЦЕ́ННОСТЬ** *ж* кәмселеклек, кәмселекле булыу, түбән (насар) сифатлылыҡ; **неполноце́нность фи́льма** фильмдың кәмселекле булыуы

**НЕПОЛНОЦЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое кәмселекле, түбән (насар) сифатлы; **неполноце́нные проду́кты** түбән сифатлы аҙыҡтар

**НЕПО́ЛНЫЙ,** -ая, -ое бүçкә, кәм, тулы булмаған; **непо́лное ведро́** бүçкә күнәк; **непо́лный курс обуче́ния** тулы булмаған уҡытыу курсы ♦ **непо́лное предложе́ние** *грам.* кәм һөйләм; **непо́лная сре́дняя шко́ла** тулы булмаған урта мәктәп (*туғыҙ йыллыҡ мәктәп*)

**НЕПОЛО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое (*обычно с сущ. "место", "время", "число", "час"*) тейешле булмаған, ярамаған; **яви́ться в неполо́женное вре́мя** ярамаған ваҡытҡа килеү

**НЕПОМЕ́РНЫЙ,** -ая, -ое сикһеҙ, саманан (сиктән) тыш; **непоме́рные тре́бования** сиктән тыш талаптар

**НЕПОНИМА́НИЕ** *с* аңламау, төшөнмәү; **по́лное непонима́ние** бөтөнләй аңламау

**НЕПОНЯ́ТЛИВОСТЬ** *ж* аңралыҡ, аңышлыҡ, маҡаулыҡ; **непоня́тливость ученика́** уҡыусының аңышлығы

**НЕПОНЯ́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое аңһыҙ, аңра, аңыш, маҡау; **непоня́тливый ребёнок** аңыш бала

**НЕПОНЯ́ТНОСТЬ** *ж* аңлайышһыҙлыҡ, аңлайышһыҙ булыу, сәйерлек; **непоня́тность сочине́ния** иншаның аңлайышһыҙлығы

**НЕПОНЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аңлайышһыҙ, аңлашылмаған; **непоня́тное сло́во** аңлайышһыҙ һүҙ **2.** (*странный*) аңлайышһыҙ, ғәжәп, сәйер; **непоня́тный слу́чай** сәйер ваҡиға

**НЕПОПАДА́НИЕ** *с* яҙа тейеү (китеү), тейҙермәү; **непопада́ние в мише́нь** сәпкә тейҙермәү

**НЕПОПРАВИ́МОСТЬ** *ж* төҙәтеп булмау, төҙәтелмәçлек булыу; **непоправи́мость оши́бки** хатаның төҙәтелмәçлек булыуы

**НЕПОПРАВИ́МЫЙ,** -ая, -ое төҙәтелмәçлек, төҙәтеп булмай торған (булмаçлыҡ); **непоправи́мая беда́** төҙәтелмәçлек бәлә

**НЕПОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* тоҡомһоҙ, яҡшы тоҡомло (тоҡомдан) булмаған; **непоро́дный скот** тоҡомһоҙ мал

**НЕПОРО́ЧНОСТЬ** *ж* сафлыҡ, ғиффәтлек, гөнаһһыҙлыҡ; **непоро́чность ю́ности** йәшлектең сафлығы; **непоро́чность мы́слей** хистәрҙең сафлығы

**НЕПОРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое саф, ғиффәтле, гөнаһһыҙ; **непоро́чная душа́** саф күңел

**НЕПОРЯ́ДОК** *м* тәртипһеҙлек, тәртип юҡлыҡ (булмау); **непоря́дки в рабо́те** эштәге тәртипһеҙлектәр

**НЕПОРЯ́ДОЧНОСТЬ** *ж* йүнһеҙлек, намыçһыҙлыҡ; **прояви́ть непоря́дочность** йүнһеҙлек күрһәтеү

**НЕПОРЯ́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое рәтһеҙ, йүнһеҙ, намыçһыҙ, насар; **непоря́дочный посту́пок** насар ҡылыныш

**НЕПОСВЯЩЁННЫЙ,** -ая, -ое хәбәрҙар (таныш) булмаған; **непосвящённый в дела́ друзе́й челове́к** дуçтарының эше менән таныш булмаған кеше

**НЕПОСЕ́ДА** *м* и *ж*; *разг.* тиктормаç, тынғыһыҙ (*кеше*)

**НЕПОСЕ́ДЛИВОСТЬ** *ж* тик тормаусанлыҡ, тынғыһыҙлыҡ; **непосе́дливость ребёнка** баланың тынғыһыҙлығы

**НЕПОСЕ́ДЛИВЫЙ,** -ая, -ое тынғыһыҙ, тиктормаç; **непосе́дливый ребёнок** тынғыһыҙ бала; **непосе́дливый хара́ктер** тынғыһыҙ холоҡ

**НЕПОСЕЩЕ́НИЕ** *с* йөрөмәү, бармау; **непосеще́ние ле́кций** лекцияға йөрөмәү

**НЕПОСИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көс (еткеһеҙ) етмәçлек, хәлдән килмәй торған (килмәçлек), ауыр; **непоси́льная рабо́та** хәлдән килмәçлек эш

**НЕПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬНОСТЬ** *ж* эҙмә-эҙлелек булмау, эҙмә-эҙлекһеҙлек; **непосле́довательность**

**ность в изложе́нии** һөйләүҙә эҙмә-эҙлелек булмау

**НЕПОСЛЕ́ДОВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое эҙмә-эҙлекһеҙ; **непосле́довательное рассужде́ние** эҙмә-эҙлекһеҙ фекер йөрөтөү

**НЕПОСЛУША́НИЕ** *с* тыңламау, буйһонмау; **наказа́ть за непослуша́ние** тыңламаған өсөн яза биреү

**НЕПОСЛУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое тыңлауһыҙ, буйһонмаусан, ҡарышҡаҡ, ҡарышыусан; **непослу́шный ребёнок** тыңлауһыҙ бала

**НЕПОСРЕ́ДСТВЕННОСТЬ** *ж* саф күңеллелек, эскерһеҙлек, тәбиғилек; **наи́вная непосре́дственность** бер ҡатлы тәбиғилек

**НЕПОСРЕ́ДСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тура, туранан-тура; **непосре́дственный нача́льник** туранан-тура хужа **2.** тәбиғи, эскерһеҙ, саф күңелле; **непосре́дственный челове́к** эскерһеҙ кеше

**НЕСХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (бер-береһенә) оҡшамаған, (үҙ-ара) оҡшаш булмаған (түгел); **несхо́дные поня́тия** бер-береһенә оҡшамаған төшөнсәләр **2.** *разг.* килешеп булмаҫлыҡ, ҡулай (уңай) булмаған; **несхо́дная цена́** килешеп булмаҫлыҡ баһа (хаҡ)

**НЕСХО́ДСТВО** *с* оҡшамағанлыҡ, оҡшашмағанлыҡ, оҡшашһыҙлыҡ; **несхо́дство хара́ктеров** холоҡтарҙың оҡшашһыҙлығы

**НЕСХО́ЖЕСТЬ** *ж*; *разг. см.* **несхо́дство**

**НЕСХО́ЖИЙ,** -ая, -ее *разг. см.* **несхо́дный** 1

**НЕСЧАСТЛИ́ВЕЦ** *м* и **НЕСЧАСТЛИ́ВИЦА** *ж*; *разг.* бәхетһеҙ кеше

**НЕСЧАСТЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәхетһеҙ; **несчастли́вый челове́к** бәхетһеҙ кеше **2.** (*неудачный*) уңмаған, уңышһыҙ; **несчастли́вый день** уңмаған көн

**НЕСЧА́СТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бәхетһеҙ; **несча́стная жизнь** бәхетһеҙ тормош **2.** *в знач. сущ.* **несча́стный** *м* бәхетһеҙ ир-ат; **несча́стная** *ж* бәхетһеҙ ҡатын-ҡыҙ **3.** бәхетһеҙлек, ҡайғылы; **несча́стный слу́чай** бәхетһеҙлек **4.** (*злосчастный*) уңмаған, уңышһыҙ; **несча́стный день** уңмаған көн **5.** (*обычно в обращении*) меҫкен, бисара, бәдбәхет

**НЕСЧА́СТЬЕ** *с* бәхетһеҙлек, ҡайғы-хәсрәт, бәлә-каза; **произошло́ несча́стье** бәхетһеҙлек килеп тыуҙы ♦ **к несча́стью**; **на несча́стье** *в знач.*

*вводн. сл.* (*для выражения сожаления, досады*) бәхетһеҙлеккә ҡаршы

**НЕСЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое бик күп, иҫәпһеҙ күп, һаны юҡ; **несчётное коли́чество** бик күп һан

**НЕСЪЕДО́БНЫЙ,** -ая, -ое ашарға яраҡһыҙ (ярамаған), ашамай торған; **несъедо́бные грибы́** ашарға ярамаған бәшмәктәр

**НЕСЫ́ТНЫЙ,** -ая, -ое туҡлыҡһыҙ, яғышһыҙ, туҡлыҡлы булмаған; **несы́тная пи́ща** туҡлыҡһыҙ аҙыҡ

**НЕСЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** аслы-туҡлы, ашап туймаған; **несы́тый скот** аслы-туҡлы мал-тыуар **2.** *перен.* (*ненасытный*) аҡсаға (мал-мөлкәткә) туймаған, ҡомһоҙ, ҡәнәғәтһеҙ, көнәрке; **несы́тые глаза́** ҡомһоҙ күҙҙәр

**НЕТ 1.** *частица* (*при отрицательном ответе на вопрос или как выражение несогласия*) юҡ; **нет, я не согла́сен с ва́ми** юҡ, мин һеҙҙең менән риза түгел **2.** *кого-чего в знач. сказ., безл.* юҡ; **у меня́ нет вре́мени** минең ваҡытым юҡ ♦ **нет и нет**; **нет да нет** юҡ та юҡ; **нет так нет** юҡ икән юҡ; **нет-нет да и** һирәк-мирәк булһа ла; **нет числа́** *кому-чему* бик күп, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ; **чего́ (то́лько) нет** ни генә юҡ, йәнеңә ни кәрәк — барыһы ла бар

**НЕТАКТИ́ЧНОСТЬ** *ж* әҙәпһеҙлек, торпайлыҡ, тәрбиәһеҙлек, ғәҙәтһеҙлек; **проявля́ть нетакти́чность** әҙәпһеҙлек күрһәтеү

**НЕТАКТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, торпай, тәрбиәһеҙ; **нетакти́чный челове́к** әҙәпһеҙ кеше

**НЕТВЁРДЫЙ,** -ая, -ое **1.** йомшаҡ; **нетвёрдая по́чва** йомшаҡ тупраҡ **2.** *перен.* ныҡымаған, ҡаҡшау, ҡыйыуһыҙ, йомшаҡ; **у него́ нетвёрдый хара́ктер** ул йомшаҡ тәбиғәтле кеше; **нетвёрдые шаги́ ребёнка** баланың ҡыйыуһыҙ аҙымдары **3.** (*о знаниях*) төплө булмаған, һай, өҫтән-мөҫтән булған; **нетвёрдые зна́ния** төплө булмаған белем

**НЕ́ТЕЛЬ** *ж* башмаҡ, ҡыҫыр тана

**НЕТЕРПЕЛИ́ВОСТЬ** *ж* түҙемһеҙлек, тәҡәтһеҙлек, сыҙамһыҙлыҡ, сабырһыҙлыҡ; **нетерпели́вость ребёнка** баланың түҙемһеҙлеге

**НЕТЕРПЕЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое түҙемһеҙ, тәҡәтһеҙ, сыҙамһыҙ, сабырһыҙ; **нетерпели́вый челове́к** сабырһыҙ кеше

**НЕТЕРПЕ́НИЕ** *с* түҙемһеҙлек, сыҙамһыҙлыҡ, сабырһыҙлыҡ; **ждать с нетерпе́нием** түҙемһеҙлек менән көтөү; **прояви́ть нетерпе́ние** сабырһыҙлыҡ күрһәтеү

**НЕТЕРПИ́МОСТЬ** *ж* түҙмәү(сәнлек), түҙерлек булмау (түгел), түҙеп торғоһоҙ (тормаҫлыҡ) булыу, иҫәпләшмәү(сәнлек); **нетерпи́мость к чужо́му мне́нию** кеше фекере менән иҫәпләшмәү

**НЕТЕРПИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*недопустимый*) түҙеп (сыҙап) тормаҫлыҡ, түҙгеһеҙ, сыҙағыһыҙ, түҙеп (сыҙап) торғоһоҙ; **нетерпи́мое положе́ние** түҙеп торғоһоҙ хәл **2.** иҫәпләшмәүсән; **нетерпи́мый к чужо́му мне́нию** башҡаларҙың фекере менән иҫәпләшмәүсән

**НЕТЁСАНЫЙ,** -ая, -ое юнылмаған; **нетёсаное бревно́** юнылмаған бүрәнә

**НЕТИПИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое типик (ғәҙәти) булмаған; **нетипи́чное явле́ние** типик булмаған күренеш

**НЕТКА́НЫЙ,** -ая, -ое һуғып (туҡып) яһалмаған; **нетка́ный узо́р** туҡып яһалмаған биҙәк

**НЕТЛЕ́ННОСТЬ** *ж*; *книжн.* (*вечность*) мәңгелек, ғүмерлек, мәңге (ғүмер буйы) онотолмаҫ(лыҡ); **нетле́нность красоты́** гүзәллектең мәңгелеге

**НЕТЛЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* мәңге онотолмаҫ, мәңге онотолмай торған, мәңгелек; **нетле́нная сла́ва** мәңгелек дан

**НЕТОПЫ́РЬ** *м* ваҡ ярғанат

**НЕТОРОПЛИ́ВОСТЬ** *ж* мыштырлыҡ, ашыҡмаусанлыҡ, яйманлыҡ, һалмаҡлыҡ, әкренлек, ығышлыҡ, бызмырлыҡ; **нетороплив́ость ре́чи** телмәрҙең һалмаҡлығы

**НЕТОРОПЛИ́ВЫЙ,** -ая, -ое мыштыр, ашыҡмаҫ, ашыҡмаусан, һалмаҡ, бызмыр, яйман, әкрен; **неторопли́вые движе́ния** әкрен хәрәкәттәр; **неторопли́вые шаги́** һалмаҡ аҙымдар

**НЕТО́ЧНОСТЬ** *ж* дөрөҫ булмау (түгеллек), хаталы булыу, хата(лыҡ), яңылыш(лыҡ); **нето́чность подсчётов** иҫәпләүҙәрҙең дөрөҫ булмауы; **найти́ нето́чности в те́ксте** текстағы хаталарҙы табыу

**НЕТО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое дөрөҫ булмаған (түгел), яңылыш, хата(лы); **нето́чные часы́** дөрөҫ йөрөмәгән сәғәт; **нето́чный текст** хаталы текст

**НЕТРЕ́БОВАТЕЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** талапсан булмау, талапһыҙлыҡ; **нетре́бовательность учи́теля** уҡытыусының талапсан булмауы **2.** талымһыҙлыҡ, талымһыҙ (түҙемле, әрһеҙ) булыу; **нетре́бовательность соба́ки** эттең талымһыҙлығы

**НЕТРЕ́БОВАТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** талапсан булмаған (түгел); **нетре́бовательные роди́тели** талапсан булмаған ата-әсәләр **2.** талымһыҙ; **нетре́бовательное живо́тное** талымһыҙ хайуан

**НЕТРЕ́ЗВЫЙ,** -ая, -ое иҫерек, эскән; **нетре́звый челове́к** иҫерек кеше; **нетре́звое состоя́ние** иҫерек хәл

**НЕТРО́НУТЫЙ,** -ая, -ое **1.** тейелмәгән, (һис кем) ҡағылмаған, бөтөн (килеш булған), ҡул теймәгән; **нетро́нутая еда́** һис кем ҡағылмаған аш **2.** *перен.* боҙолмаған, саф, ғиффәтле; **нетро́нутые чу́вства** саф хистәр

**НЕТРУ́ДНЫЙ,** -ая, -ое еңел, анһат; **нетру́дная зада́ча** еңел мәсьәлә

**НЕТРУДОВО́Й,** -ая, -ое **1.** эшләмәй торған, эшләмәгән; **нетрудова́я часть населе́ния** эшләмәгән халыҡ **2.** эшләмәй табылған, эшләп табылмаған, хәләл булмаған, хәрәм; **нетрудово́й дохо́д** эшләмәй табылған килем, хәрәм мал

**НЕТРУДОСПОСО́БНОСТЬ** *ж* эшкә (хеҙмәткә) яраҡһыҙлыҡ; **вре́менная нетрудоспосо́бность** ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ

**НЕТРУДОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое эшкә (хеҙмәткә) яраҡһыҙ (ярамаған); **нетрудоспосо́бный член семьи́** ғаиләнең хеҙмәткә яраҡһыҙ ағзаһы

**НЕ́ТТО** *прил.* и *нареч. неизм.*; *торг.* нетто, саф ауырлыҡ (*тауарҙың һауытынан башҡа ауырлығы*)

**НЕ́ТУ** *в знач. сказ., безл.*; *разг. см.* **нет** 2

**НЕУБЕДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ышандырғыһыҙ (ышандыра алмаҫлыҡ) булыу; **неубеди́тельность до́водов** дәлилдәрҙең ышандыра алмаҫлыҡ булыуы

**НЕУБЕДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ышандырғыһыҙ, ышандыра алмаҫлыҡ; **неубеди́тельный приме́р** ышандыра алмаҫлыҡ миҫал

**НЕУВАЖЕ́НИЕ** *с* и **НЕУВАЖИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* хөрмәт күрһәтмәү(сәнлек), һанға һуҡмау(санлыҡ), ихтирам итмәү(сәнлек), ололамау(санлыҡ); **неуваже́ние к ста́ршим** ололарҙы ихтирам итмәү

**НЕУВАЖИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** иғтибарға алынмаҫлыҡ, кисермәҫлек, дәлилһеҙ; **неуважи́тельная причи́на** кисермәҫлек сәбәп **2.** ихтирам (хөрмәт) итмәгән, һанға һуҡмаған; **неуважи́тельные слова́** һанға һуҡмаған һүҙҙәр

**НЕУВЕ́РЕННОСТЬ** *ж* ҡыйыуһыҙлыҡ, икеләнеү, ышанып етмәү; **неуве́ренность в себе́** үҙеңә ышанып етмәү

**НЕУВЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое ҡыйыуһыҙ, икеләнгән, икеләнеүсән, ышанып етмәүсән (етмәгән); **неуве́ренный в себе́ челове́к** үҙенә ышанып етмәгән кеше; **неуве́ренный отве́т** ҡыйыуһыҙ яуап

**НЕУВЯДА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое и **НЕУВЯДА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее *книжн.* **1.** шиңмәй (һулымай) торған, мәңге һулымаҫ (шиңмәҫ); **неувяда́емая красота́** мәңге һулымаҫ матурлыҡ **2.** *перен., книжн.* мәңгелек, мәңге онотмаҫ(лыҡ), ғүмерлек; **неувяда́емая сла́ва** мәңгелек дан

**НЕУВЯ́ЗКА** *ж*; *разг. см.* **несогласо́ванность**

**НЕУГАСИ́МЫЙ** и **НЕУГАСА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *высок., прям., перен.* мәңге һүнмәҫ, һүнмәй торған; **неугаси́мая любо́вь** мәңге һүнмәҫ мөхәббәт

**НЕУГО́ДНЫЙ,** -ая, -ое кәрәкмәгән, ярай алмаған, күңелгә хуш килмәгән, оҡшамаған; **неуго́дные хозя́ину слу́ги** хужаға оҡшамаған хеҙмәтселәр

**НЕУГОМО́ННЫЙ,** -ая, -ое тынғыһыҙ, тынысһыҙ, арымаҫ, өҙләкһеҙ, туҡтауһыҙ; **неугомо́нный ребёнок** тынысһыҙ бала; **неугомо́нный ве́тер** өҙләкһеҙ иҫкән ел

**НЕ́УД** *м*; *разг. см.* **неудовлетвори́тельно** 2

**НЕУДА́ЧА** *ж* уңышһыҙлыҡ; **потерпе́ть неуда́чу** уңышһыҙлыҡҡа осрау

**НЕУДА́ЧЛИВЫЙ,** -ая, -ое эше уңмай торған, даланһыҙ, бәхетһеҙ; **неуда́чливый челове́к** даланһыҙ кеше

**НЕУДА́ЧНИК** *м* и **НЕУДА́ЧНИЦА** *ж* эше уңмай торған кеше, даланһыҙ кеше

**НЕУДА́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уңышһыҙ, уңмаған; **неуда́чная пое́здка** уңышһыҙ юл **2.** насар, насар сыҡҡан; **неуда́чный фотосни́мок** насар сыҡҡан фотоһүрәт

**НЕУДЕРЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое тыйылғыһыҙ, тыйыла алмай (тыйып булмай) торған, бик көслө; **неудержи́мое жела́ние** бик көслө теләк

**НЕУДО́БНЫЙ,** -ая, -ое **1.** уңайһыҙ, яйһыҙ, йәпһеҙ, ҡулайһыҙ, ипһеҙ; **неудо́бное ме́сто** уңайһыҙ урын **2.** *перен.* уңайһыҙ, ҡыйын, ауыр, күңелһеҙ; **попа́сть в неудо́бное положе́ние** уңайһыҙ хәлгә ҡалыу

**НЕУДОБОВАРИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ауыр һеңә (үҙләштерелә) торған; **неудобовари́мая пи́ща** ауыр һеңә торған аш **2.** *перен., ирон.* ауыр аңлашыла торған, аңлауы ҡыйын булған; **неудобовари́мая статья́** ауыр аңлашыла торған мәҡәлә

**НЕУДОБОПРОИЗНОСИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** әйтеүе ҡыйын, ҡыйын әйтелешле; **неудобопроизноси́мые зву́ки** ҡыйын әйтелешле өндәр **2.** әҙәпһеҙ, оятһыҙ; **неудобопроизноси́мая брань** әҙәпһеҙ һүгенеү

**НЕУДО́БСТВО** *с* уңайһыҙлыҡ, яйһыҙлыҡ; **мири́ться с неудо́бствами** уңайһыҙлыҡтарға күнеү

**НЕУДО́БЬ** *ж*; *разг.* сәсеү өсөн яраҡһыҙ ер

**НЕУДОВЛЕТВОРЕ́НИЕ** *с* и **НЕУДОВЛЕТВОРЁННОСТЬ** *ж* ҡәнәғәтһеҙлек, ҡәнәғәтләнмәгәнлек; **неудовлетворённость рабо́той** эш менән ҡәнәғәтләнмәгәнлек

**НЕУДОВЛЕТВОРЁННЫЙ,** -ая, -ое ҡәнәғәтһеҙ, ҡәнәғәтләндер(ел)мәгән, ҡәнәғәт булмаған; **неудовлетворённое любопы́тство** ҡәнәғәтләндерелмәгән ҡыҙыҡһыныу

**НЕУДОВЛЕТВОРИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* **1.** насар, ҡәнәғәтләнерлек (дәрәжәлә) булмау; **рабо́та сде́лана неудовлетвори́тельно** эш ҡәнәғәтләнерлек дәрәжәлә башҡарылмаған **2.** *в знач. сущ.* **неудовлетвори́тельно** *с нескл.* (*отметка*) насар билдәһе

**НЕУДОВЛЕТВОРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡәнәғәтләнерлек булмаған (итеп эшләнмәгән); **неудовлетвори́тельная рабо́та** ҡәнәғәтләнерлек итеп башҡарылмаған эш

**НЕУДОВО́ЛЬСТВИЕ** *с* ризаһыҙлыҡ; **вы́разить неудово́льствие** ризаһыҙлыҡ белдереү

**НЕУЁМНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*неугомонный, неудержимый*) арыу-талыуҙы белмәгән, тынғыһыҙ, тиктормаҫ, туҡтамай торған; **неуёмный челове́к** тынғыһыҙ кеше

**НЕУЖЕ́ЛИ** *частица* (*разве, возможно ли*) -мы/-ме ни, -маҫмы/-мәҫме икән (ни), ысынмы,

шулаймы; **неуже́ли он не придёт?** ул килмәҫме икән ни?

**НЕУЖИ́ВЧИВОСТЬ** *ж* һыйыша (тыныша) алмау; **неужи́вчивость сосе́дей** күршеләрҙең тыныша алмауы

**НЕУЖИ́ВЧИВЫЙ,** -ая, -ое һыйышмаусан, тынышмаусан; **быть неужи́вчивым** (кеше менән) тынышмаусан булыу

**НЕУ́ЖТО** *частица*; *прост. см.* **неуже́ли**

**НЕУЗНАВА́ЕМОСТЬ** *ж* танымаҫлыҡ булыу ♦ **до неузнава́емости** танымаҫлыҡ булыу; **измени́ться до неузнава́емости** танымаҫлыҡ булып үҙгәреү

**НЕУЗНАВА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое танығыһыҙ, танымаҫлыҡ; **неузнава́емые измене́ния** танымаҫлыҡ үҙгәрештәр

**НЕУКЛО́ННЫЙ,** -ая, -ое тайпылышһыҙ, ныҡлы, ҡаҡшамаҫ, өҙлөкһөҙ; **неукло́нный рост** өҙлөкһөҙ үҫеш; **неукло́нная во́ля** ныҡлы ихтыяр

**НЕУКЛЮ́ЖИЙ,** -ая, -ее **1.** (*о человеке*) ауыр һөйәкле (кәүҙәле), килбәтһеҙ, һынһыҙ; **неуклю́жий челове́к** килбәтһеҙ кеше **2.** (*о предметах*) килбәтһеҙ, килешһеҙ, йәмһеҙ; **неуклю́жий дива́н** килбәтһеҙ диван **3.** йәмһеҙ, ҡолаҡҡа ятышһыҙ; **неуклю́жее сло́во** ҡолаҡҡа ятышһыҙ һүҙ

**НЕУКОСНИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж*; *книжн.* тайпылышһыҙ (ҡаршылыҡһыҙ, мотлаҡ) булыу; **неукосни́тельность соблюде́ния шко́льных пра́вил** мәктәп ҡағиҙәләрен һаҡлауҙың мотлаҡ булыуы

**НЕУКОСНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* тайпылышһыҙ, тайпылыуһыҙ, мотлаҡ; **неукосни́тельное исполне́ние** тайпылышһыҙ башҡарыу

**НЕУКРОТИ́МОСТЬ** *ж* ҡулға эйәләштереп (өйрәтеп) булмау, тыйғыһыҙ (ҡоторонҡо, ярһыулы) булыу, тыйып тотҡоһоҙ булыу; **неукроти́мость звéря** йыртҡыстың ҡулға эйәләшмәҫ булыуы

**НЕУКРОТИ́МЫЙ,** -ая, -ое ҡулға эйәләштереп (өйрәтеп) булмай торған, ҡулға эйәләшмәй (өйрәнмәй) торған, дыуамал, ярһыу, уҫал; **неукроти́мая ло́шадь** ҡулға эйәләшмәй торған ат; **неукроти́мый хара́ктер** дыуамал холоҡ

**НЕУЛОВИ́МОСТЬ** *ж* тоттормай торған (тотоп булмай торған) булыу, һиҙелер-һиҙелмәҫ (күренер-күренмәҫ, беленер-беленмәҫ, ишетелер-ишетелмәҫ) булыу, асыҡ (аныҡ) түгеллек; **неулови́мость движе́ний** хәрәкәттәрҙең һиҙелер-һиҙелмәҫ булыуы

**НЕУЛОВИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** тоттормаған, тоттормай (тотолмай) торған, тотоп (осратып, тура килтереп) булмай торған; **неулови́мые мсти́тели** тоттормаған үс алыусылар **2.** һиҙелер-һиҙелмәҫ, күренер-күренмәҫ, ишетелер-ишетелмәҫ, беленер-беленмәҫ; **неулови́мые зву́ки** ишетелер-ишетелмәҫ тауыштар

**НЕУЛЫ́БЧИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* йылмайып бармаған, һирәк йылмайыусан, томһа, ҡараңғы сырайлы; **неулы́бчивый челове́к** һирәк йылмайыусан кеше

**НЕУМЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое бешәлкәһеҙ, ибәтәйһеҙ, һәләтһеҙ; **неуме́лые движе́ния** ибәтәйһеҙ хәрәкәттәр; **неуме́лый руководи́тель** һәләтһеҙ етәксе

**НЕУМЕ́НИЕ** *с* белмәү, булдыра алмау; **неуме́ние мы́слить глубоко́** тәрән фекер йөрөтә белмәү; **неуме́ние рабо́тать** эшләй белмәү

**НЕУМЕ́РЕННОСТЬ** *ж* самаһыҙлыҡ, саманан тыш булыу; **неуме́ренность тре́бований** талаптарҙың самаһыҙлығы

**НЕУМЕ́РЕННЫЙ,** -ая, -ое саманан тыш, сама белмәүсе, самаһыҙ, ҡәнәғәтһеҙ; **неуме́ренная стро́гость** саманан тыш ҡатылыҡ; **неуме́ренный челове́к** сама белмәүсе кеше

**НЕУМЕ́СТНОСТЬ** *ж* урынһыҙлыҡ, урынһыҙ булыу; **неуме́стность вопро́са** һорауҙың урынһыҙ булыуы

**НЕУМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое урынһыҙ, нигеҙһеҙ; **неуме́стная про́сьба** урынһыҙ үтенес

**НЕУ́МНЫЙ,** -ая, -ое аҡылһыҙ, аҡылға һай, уйланмай эшләнгән; **неу́мный челове́к** аҡылға һай кеше; **неу́мный посту́пок** уйланмай эшләнгән ҡылыҡ

**НЕУМОЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** һүҙгә күнмәүсән, һүҙгә күндереп булмай торған, ыҡҡа килмәүсән; **неумоли́мый челове́к** һүҙгә күндереп булмай торған кеше **2.** *перен.* боҙолмаҫ, үҙгәрмәҫ, ҡотолғоһоҙ; **неумоли́мые си́лы** ҡотолғоһоҙ көстәр

**НЕУМОЛКА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое *см.* **несмолка́емый**

**НЕУМЫ́ШЛЕННОСТЬ** *ж* яман ниәт менән булмау, боҙоҡлоҡ уйлап эшләнмәгәнлек, ихтыярһыҙлыҡ; **неумы́шленность обма́на** алдауҙың яман ниәт менән булмауы

**НЕУМЫ́ШЛЕННЫЙ,** -ая, -ое яман ниәт менән (боҙоҡлоҡ уйлап) эшләнмәгән, ихтыярһыҙ (эшләнгән), алдан уйлап эшләнмәгән; **неумы́шленное преступле́ние** ихтыярһыҙ эшләнгән енәйәт

**НЕУНЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгән, шат (көр) күңелле; **неунывáющий челове́к** күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгән кеше

**НЕУПЛА́ТА** *ж* түләмәү, түләнмәү; **неупла́та долго́в** бурыстарҙы түләмәү

**НЕУПОРЯ́ДОЧЕННЫЙ,** -ая, -ое тәртипһеҙ, системаһыҙ, рәте-сираты булмаған, рәтһеҙ; **неупоря́доченный о́браз жи́зни** рәте-сираты булмаған тормош

**НЕУПОТРЕБИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* ҡулланылмай торған булыу, ҡулланылмау; **неупотреби́тельность выраже́ния** әйтемдең ҡулланылмауы

**НЕУПОТРЕБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡулланылмаған, ҡулланылмай торған; **неупотреби́тельные слова́** ҡулланылмай торған һүҙҙәр

**НЕУРАВНОВЕ́ШЕННОСТЬ** *ж* ҡыҙыулыҡ, яндырайлыҡ, тотороҡһоҙлоҡ; **неуравнове́шенность хара́ктера** холоҡтоң ҡыҙыулығы

**НЕУРАВНОВЕ́ШЕННЫЙ,** -ая, -ое тотанаҡһыҙ, ҡыҙыу, тотороҡһоҙ; **неуравнове́шенный челове́к** ҡыҙыу кеше

**НЕУРОЖА́Й** *м* иген уңмау, уңыш насар булыу, уңыш булмау

**НЕУРОЖА́ЙНЫЙ,** -ая, -ое уңыш булмаған (насар булған), иген уңмаған; **неурожа́йный год** иген уңмаған йыл

**НЕУРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** билдәләнгән ваҡыттан тыш; **рабо́тать в неуро́чное вре́мя** билдәләнгән ваҡыттан тыш эшләү **2.** (*неподходящий по времени*) ваҡытһыҙ; **прийти́ в неуро́чный час** ваҡытһыҙ килеү

**НЕУРЯ́ДИЦА** *ж*; *разг.* **1.** (*беспорядок*) бола, тәртипһеҙлек; **неуря́дицы в го́роде** ҡалалағы тәртипһеҙлек **2.** (*ссора*) үҙ-ара тынышмау, тынысһыҙлыҡ, ыҙғыш, талаш; **неуря́дицы в семье́** ғаиләләге тынысһыҙлыҡ

**НЕУСИ́ДЧИВЫЙ,** -ая, -ое сыҙамһыҙ, түҙемһеҙ, ултыраҡһыҙ; **неуси́дчивый ребёнок** түҙемһеҙ бала

**НЕУСПЕВА́ЕМОСТЬ** *ж* өлгәшмәү; **отчи́слить студе́нта за неуспева́емость** студентты өлгәшмәгән өсөн уҡыуҙан сығарыу

**НЕУСПЕВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** өлгәшмәүсе; **неуспева́ющий учени́к** өлгәшмәүсе уҡыусы **2.** *в знач. сущ.* **неуспева́ющий** *м* и **неуспева́ющая** *ж* өлгәшмәүсе, насар өлгәшеүсе

**НЕУСПЕ́Х** *м* уңышһыҙлыҡ; **неуспе́х в дела́х** эштәге уңышһыҙлыҡ

**НЕУСПЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое уңышһыҙ; **неуспе́шная охо́та** уңышһыҙ һунар

**НЕУСТА́ННЫЙ,** -ая, -ое бер туҡтауһыҙ, өҙләкһеҙ, арымай-талмай; **неуста́нная рабо́та** арымай-талмай эшләү

**НЕУСТО́ЙКА** *ж* (*штраф*) неустойка; **уплати́ть неусто́йку** неустойка түләү

**НЕУСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое **1.** һелкенеүсән, аушанлаҡ; **неусто́йчивый стул** аушанлаҡ ултырғыс **2.** тотороҡһоҙ, үҙгәреүсән; **неусто́йчивая пого́да** үҙгәреүсән һауа **3.** *перен.* (*непостоянный*) аумаҡай; **неусто́йчивый хара́ктер** аумаҡай холоҡ(ло)

**НЕУСТРАНИ́МЫЙ,** -ая, -ое бөтөргөһөҙ, бөтөрөп булмай торған, ҡотолғоһоҙ, ҡотолоп булмай торған; **неустрани́мые препя́тствия** ҡотолғоһоҙ ҡаршылыҡтар

**НЕУСТРАШИ́МОСТЬ** *ж* ҡурҡыу белмәү, батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, ҡыйыу (батыр йөрәкле) булыу; **отлича́ться неустраши́мостью** ҡыйыулыҡ менән айырылып тороу (танылыу)

**НЕУСТРАШИ́МЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡыуһыҙ, ҡыйыу, батыр; **неустраши́мый бое́ц** ҡыйыу яугир

**НЕУСТРО́ЕННОСТЬ** *ж* тәртипкә (рәткә, яйға) һалынмаған булыу; **неустро́енность жи́зни** тормоштоң тәртипкә һалынмаған булыуы

**НЕУСТРО́ЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәртипкә (рәткә, яйға) һалынмаған, рәтләнмәгән; **неустро́енный быт** яйға һалынмаған көнкүреш **2.** (*о человеке*) тормош ҡормаған, урынлашмаған; **неустро́енный челове́к** тормош ҡормаған кеше

**НЕУСТРО́ЙСТВО** *с* яйһыҙлыҡ, тәртипкә (рәткә, яйға) һалынмағанлыҡ; **дома́шнее неустро́йство** өйҙәге яйһыҙлыҡтар

**НЕУСТУ́ПЧИВОСТЬ** *ж* еңмешлек, һүҙ(ен) бирмәү(сәнлек), үҙһүҙлелек; **проявля́ть неусту́пчивость** үҙһүҙлелек күрһәтеү

**НЕУСТУ́ПЧИВЫЙ,** -ая, -ое еңмеш, үҙ һүҙле, һүҙен бирмәгән, һүҙенән кире ҡайтмай торған; **неусту́пчивый челове́к** үҙ һүҙле кеше

**НЕУСЫ́ПНЫЙ,** -ая, -ое бер туҡтауһыҙ, өҙләкһеҙ, уяу, ныҡ; **неусы́пный надзо́р** бер туҡтауһыҙ күҙәтеү

**НЕУТЕШИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* йыуаныссыҙ (күңелһеҙ) булыу, борсоулы (шомло, хәүефле) булыу; **неутеши́тельность све́дений** хәбәр(ҙәр)ҙең борсоулы булыуы

**НЕУТЕШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йыуаныссыҙ, күңелһеҙ, күңелгә борсоу (шом) һалған, шомло, хәүефле, борсоулы; **неутеши́тельный отве́т** йыуаныссыҙ яуап

**НЕУТЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое йыуатып (әүрәтеп, тынысландырып) булмаған; **неуте́шный челове́к** йыуатып булмаған кеше

**НЕУТОЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡанмаҫ(лыҡ), баҫылмаҫ(лыҡ); **неутоли́мая жа́жда** (танһыҡ) ҡанмаҫлыҡ сарсау **2.** *перен.* бик көслө (ныҡ), ғәҙәттән тыш; **неутоли́мое стремле́ние** бик көслө ынтылыш

**НЕУТОМИ́МОСТЬ** *ж* арыу-талыуҙы белмәгәнлек; **отлича́ться неутоми́мостью** арыу-талыуҙы белмәгәнлеге менән айырылып тороу

**НЕУТОМИ́МЫЙ,** -ая, -ое арыу-талыуҙы белмәүсе (белмәгән); **неутоми́мый тру́женик** арыу-талыуҙы белмәгән эшсән кеше

**НЕУХО́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡаралмаған, ташландыҡ, тәртипкә килтерелмәгән, яйға һалынмаған; **неухо́женный сад** ҡаралмаған баҡса

**НЕ́УЧ** *м*; *разг.* наҙан, томана; **расти́ не́учем** наҙан булып үҫеү

**НЕУЧЁНЫЙ,** -ая, -ое уҡымаған, белемһеҙ; **неучёный челове́к** уҡымаған кеше

**НЕУЧТИ́ВОСТЬ** *ж* әҙәпһеҙлек, ихтирамһыҙлыҡ, әҙәпһеҙ ҡыланыш; **проявля́ть неучти́вость** әҙәпһеҙлек күрһәтеү

**НЕУЧТИ́ВЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, тәртипһеҙ, ихтирамһыҙ; **неучти́вый челове́к** әҙәпһеҙ кеше; **неучти́вое замеча́ние** әҙәпһеҙ иҫкәртмә

**НЕУЮ́ТНОСТЬ** *ж* уңайһыҙлыҡ, яйһыҙлыҡ, йыйнаҡһыҙлыҡ, йәмһеҙ (ҡотһоҙ) булыу, ҡот-

һоҙлоҡ; **неую́тность ко́мнаты** бүлмәнең ҡотһоҙлоғо

**НЕУЮ́ТНЫЙ,** -ая, -ое уңайһыҙ, яйһыҙ, йыйнаҡһыҙ, ҡотһоҙ, күңелгә ятмай торған, йәмһеҙ; **неую́тный дом** ҡотһоҙ өй

**НЕУЯЗВИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** түҙемле, һүҙ күтәреүсән, сабыр; **неуязви́мое се́рдце** түҙемле йөрәк **2.** нигеҙле, төплө, бәйләнерлек түгел, тел тейҙергеһеҙ; **неуязви́мое мне́ние** төплө фекер

**НЕФЕЛИ́Н** *м* нефелин (*минерал*)

**НЕФЕЛИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** нефелин; **нефели́новое произво́дство** нефелин етештереү **2.** нефелинлы; **нефели́новое удобре́ние** нефелинлы ашлама

**НЕФРИ́Т I** *м* нефрит (*минерал*)

**НЕФРИ́Т II** *м*; *мед.* нефрит (*бөйөр шешеүе*)

**НЕФРИ́ТОВЫЙ,** -ая, -ое нефрит, нефрит ...ы, нефриттан яһалған (эшләнгән); **нефри́товые слои́** нефрит ҡатлауҙары; **нефри́товая ва́за** нефрит(тан яһалған) ваза

**НЕФТЕДОБЫВА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее нефть табыу ...ы; **нефтедобыва́ющая о́трасль** нефть табыу тармағы

**НЕФТЕНАЛИВНО́Й,** -ая, -ое нефть ...ы, нефть ташый торған; **нефтеналивно́е су́дно** нефть ташый торған судно, нефть судноһы

**НЕФТЕНО́СНОСТЬ** *ж* нефтле (нефть сыға торған) булыу; **нефтено́сность пласта́** ҡатламдың нефтле булыуы

**НЕФТЕНО́СНЫЙ,** -ая, -ое нефтле, нефть табыла (сыға) торған; **нефтено́сные зе́мли** нефть табыла торған ерҙәр

**НЕФТЕПЕРЕГО́ННЫЙ,** -ая, -ое нефть ҡыуа торған, нефть ҡыуыу ...ы; **нефтеперего́нная аппарату́ра** нефть ҡыуыу аппараттары

**НЕФТЕПЕРЕРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее нефть эшкәртеү ...ы; **нефтеперераба́тывающий заво́д** нефть эшкәртеү заводы

**НЕФТЕПРОВО́Д** *м* нефть үткәргес торбалар

**НЕФТЕПРОДУ́КТЫ** *мн.* (*ед.* **нефтепроду́кт** *м*) нефть продукттары (*кәрәсин, бензин, мазут, вазелин һ.б.*)

**НЕФТЕПРО́МЫСЕЛ** *м* нефть промыслаһы (*нефть таба һәм сығара торған предприятие*)

**НЕФТЕХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* нефть һаҡлау урыны, нефть һаҡлағыс (*ҡоролма*)

**НЕФТЬ** *ж* нефть

**НЕФТЯ́НИК** *м* нефтсе (*эшсе йәки белгес*)

**НЕФТЯНО́Й,** -ая, -ое нефть ...ы; **нефтяна́я промы́шленность** нефть сәнәғәте

**НЕХВА́ТКА** *ж*; *разг.* етмәү, етешмәү, ҡыҫынҡылыҡ, ҡытлыҡ; **нехва́тка де́нег** аҡса яғынан ҡыҫынҡылыҡ

**НЕХИ́ТРЫЙ,** -ая, -ое **1.** хәйләһеҙ, бер ҡатлы; **нехи́трый челове́к** хәйләһеҙ кеше **2.** *разг.* ябай, ҡатмарлы түгел (булмаған), анһат, еңел; **нехи́трое устро́йство** ябай ҡоролма

**НЕХОДОВО́Й,** -ая, -ое *разг.* үтемһеҙ, үтмәҫ, үтмәй торған, һатылмай ятҡан; **неходово́й това́р** үтмәҫ тауар

**НЕХО́ЖЕНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* кеше аяғы баҫмаған, кеше йөрөмәгән; **нехо́женые места́** кеше йөрөмәгән урындар

**НЕХОРО́ШИЙ,** -ая, -ее насар, яман, алама; **нехоро́шая пого́да** насар һауа торошо; **нехоро́ший взгляд** яман ҡараш; **нехоро́шая привы́чка** насар ғәҙәт

**НЕХОРОШО́ 1.** *нареч.* насар; **вести́ себя́ нехорошо́** үҙеңде насар тотоу **2.** *в знач. сказ., безл.* насар, яҡшы түгел; **так нехорошо́** былай насар **3.** *кому в знач. сказ., безл.* (*о самочувствии*) насар, хәл (кәйеф) яҡшы түгел (ҡырылыу, төшөү); **ему́ ста́ло нехорошо́** уның кәйефе ҡырылды, хәле насарланып китте

**НЕ́ХОТЯ** *нареч.* теләр-теләмәҫ, теләмәйенсә (генә); **не́хотя отвеча́ть** теләр-теләмәҫ яуап биреү

**НЕЦЕЛЕСООБРА́ЗНОСТЬ** *ж* маҡсатҡа яуап бирмәү (тура килмәү), маҡсатҡа ярашлы булмау, кәрәкһеҙлек; **нецелесообра́зность рабо́ты над ру́кописью** ҡулъяҙма өҫтөндә эшләүҙең кәрәкһеҙлеге

**НЕЦЕЛЕСООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое маҡсатҡа яуап бирмәгән (тура килмәгән, ярашлы булмаған), файҙаһыҙ, кәрәкһеҙ; **нецелесообра́зная тра́та вре́мени** ваҡытты файҙаһыҙға әрәм итеү

**НЕЦЕНЗУ́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** цензураһыҙ, цензуранан үтмәҫлек; **нецензу́рные произведе́ния** цензуранан үтмәҫлек әҫәрҙәр **2.** *перен.* әҙәпһеҙ, оятһыҙ, әшәке; **нецензу́рные слова́** әҙәпһеҙ һүҙҙәр

**НЕЧА́ЯННОСТЬ** *ж* яңылышлыҡ, көтөлмәгән(лек), көтмәҫтән (уйламаҫтан) булыу, көтөлмәгән (хәл); **неча́янность встре́чи** көтөлмәгән осрашыу; **по неча́янности** аңғармаҫтан

**НЕЧА́ЯННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*ненамеренный*) аңғармаҫтан, осраҡлы, абайламаҫтан; **неча́янный вы́стрел** аңғармаҫтан атып ебәреү **2.** (*неожиданный*) көтөлмәгән, көтмәгән, ҡапыл булған, көтмәҫтән булған; **неча́янная ра́дость** көтөлмәгән шатлыҡ

**НЕ́ЧЕГО I** *мест. с неопр.* (*в значении* "*нет ничего, что бы*") юҡ, бер нәмә лә (ни ҙә) юҡ, бер нәмә лә (ни ҙә); **не́чего расска́зывать** һөйләргә бер нәмә лә юҡ ♦ **не́чего де́лать** бер нәмә лә эшләп булмай, бүтән сара юҡ; **не́чего греха́ таи́ть** йәшерен-батырын түгел, йәшереп тораһы юҡ; **не́чего сказа́ть** әйтеп тораһы ла юҡ, һөйләп тә тораһы юҡ; **от не́чего де́лать** эш юҡтан эш итеп (табып), эш юҡлыҡтан

**НЕ́ЧЕГО II** *в знач. сказ., с неопр.*; *разг.* (*не следует, незачем*) ла/лә юҡ, ла/лә кәрәкмәй, ла/лә ярамай, ярамай, кәрәге юҡ, -маҫ/-мәҫ ине; **об э́том и ду́мать не́чего** был турала уйлап тораһы ла юҡ; **не́чего разгова́ривать** һөйләшеүҙең кәрәге юҡ

**НЕЧЕЛОВЕ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** кеше көсөнән (хәленән) килмәслек, кеше булдыра алмаслыҡ, сиктән тыш ҙур; **нечелове́ческие уси́лия** сиктән тыш ҙур тырышлыҡ **2.** (*не свойственный человеку*) кешегә хас булмаған, кешелекһеҙ, рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ; **нечелове́ческие отноше́ния ме́жду людьми́** кешеләр араһындағы рәхимһеҙ мөнәсәбәттәр

**НЕЧЕЛОВЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое кешелекһеҙ, шәфҡәтһеҙ, рәхимһеҙ; **нечелове́чное обраще́ние** рәхимһеҙ мөғәмәлә

**НЕЧЕРНОЗЁМНЫЙ,** -ая, -ое ҡара тупраҡлы булмаған, тупрағы ҡара булмаған; **нечернозёмная зо́на** ҡара тупраҡлы булмаған зона

**НЕЧЁСАНЫЙ,** -ая, -ое таралмаған, туҙған, туҙғаҡ (сәс); **нечёсаная голова́** туҙған баш

**НЕЧЕ́СТНОСТЬ** *ж* намыҫһыҙлыҡ, выжданһыҙлыҡ, намыҫһыҙ (выжданһыҙ) булыу; **уличи́ть в нече́стности** намыҫһыҙлығын фаш итеү

**НЕЧЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое намыҫһыҙ, выжданһыҙ, инабатһыҙ, тоғролоҡһоҙ; **нече́стные лю́ди** выжданһыҙ кешеләр; **нече́стный посту́пок** намыҫһыҙ эш

**НЕ́ЧЕТ** *м*; *разг.* таҡ ♦ **чёт и не́чет** таҡмы, йопмо (*уйын*)

**НЕЧЁТКИЙ,** -ая, -ое тоноҡ, асыҡ түгел, танымаслыҡ; **нечёткий рису́нок** тоноҡ һүрәт

**НЕЧЁТКОСТЬ** *ж* тоноҡлоҡ, танымаслыҡ, асыҡ булмау; **нечёткость изображе́ния** төшөрөлгән һүрәттең асыҡ булмауы

**НЕЧЁТНЫЙ,** -ая, -ое таҡ; **нечётное число́** таҡ һан

**НЕЧИСТОПЛО́ТНОСТЬ** *ж*; *прям.*, *перен.* бысраҡлыҡ, әшәкелек, шаҡшылыҡ, шапшаҡлыҡ; **нечистопло́тность посту́пка** ҡылыҡтың бысраҡлығы

**НЕЧИСТОПЛО́ТНЫЙ,** -ая, -ое *прям.*, *перен.* бысраҡ, шаҡшы, әшәке; **нечистопло́тный челове́к** әшәке кеше

**НЕЧИСТОТА́** *ж* **1.** бысраҡлыҡ; **нечистота́ коридо́ра** коридорҙың бысраҡлығы **2.** *мн.* **нечисто́ты** нәжес, йыуынтыҡ, ташландыҡ

**НЕЧИ́СТЫЙ,** -ая, -ое **1.** керле, бысраҡ; **нечи́стая руба́шка** керле күлдәк; **нечи́стая посу́да** бысраҡ һауыт-һаба **2.** (*с примесью*) саф (таҙа) түгел, ҡатнаш, сүпле, тоноҡ, саф тоҡомло булмаған; **нечи́стая гли́на** ҡатнаш балсыҡ; **нечи́стая рожь** сүпле арыш; **нечи́стый цвет** тоноҡ төҫ; **соба́ка нечи́стой поро́ды** саф тоҡомло булмаған эт **3.** (*неточный — о произношении*) таҙа (аныҡ) булмаған; **нечи́стый вы́говор** бик үк аныҡ булмаған әйтелеш **4.** *разг.* (*выполненный недостаточно тщательно*) еренә еткереп эшләнмәгән, насар; **нечи́стая рабо́та** еренә еткереп эшләнмәгән эш **5.** *перен.* (*нечестный*) алдаҡ, алдауға (хәйләгә) ҡоролған; **нечи́стые дела́** алдаҡ эштәр ♦ **нечи́стый дух**; **нечи́стая си́ла** *прост.* ен, бәрей, шайтан; **нечи́стый на́ руку** ҡулы кәкре (уғры, бур)

**НЕ́ЧИСТЬ** *ж собир.*; *разг.* **1.** *фольк.* ен-бәрей(ҙәр), шайтан(дар); **лесна́я не́чисть** урман бәрейе **2.** *перен.* (*презренные, недостойные люди*) хәшәрәт(тәр), ерәнес зат(тар); **вра́жеская не́чисть** дошман хәшәрәттәре

**НЕЧЛЕНОРАЗДЕ́ЛЬНОСТЬ** *ж* аңлайышһыҙлыҡ, аңлайышһыҙ (буталсыҡ) булыу; **нечленоразде́льность ре́чи** телмәрҙең аңлайышһыҙ булыуы

**НЕЧЛЕНОРАЗДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое буталсыҡ, аңлайышһыҙ; **нечленоразде́льная речь** аңлайышһыҙ телмәр

**НЕ́ЧТО** *мест.* (*что-то*) ниҙер, нимәлер, бер нәмә, әллә нимә; **не́что стра́нное** сәйер бер нәмә

**НЕЧУВСТВИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* һиҙмәү(сәнлек), тоймау(санлыҡ); **нечувстви́тельность к хо́лоду** һыуыҡты һиҙмәү

**НЕЧУВСТВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һиҙмәҫ, тоймаҫ, һиҙмәүсән, тоймаусан; **нечувстви́тельный к красоте́** матурлыҡты тоймаусан

**НЕШИРО́КИЙ,** -ая, -ое киң булмаған (түгел), тар (ғына); **неширо́кая река́** киң булмаған йылға

**НЕШУ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* уйын түгел, әһәмиәтле (етди) генә; **нешу́точная боле́знь** етди ауырыу; **нешу́точные слова́** уйын һүҙҙәр түгел; **нешу́точное де́ло** уйын эш түгел

**НЕЩА́ДНЫЙ,** -ая, -ое рәхимһеҙ, аяуһыҙ, мәрхәмәтһеҙ, шәфҡәтһеҙ; **неща́дная месть** аяуһыҙ үс

**НЕЭКОНО́МНЫЙ,** -ая, -ое бәрәшән, иҫәпһеҙ (һаҡламай) тотона торған, әрәм-шәрәм; **неэконо́мная хозя́йка** бәрәшән хужабикә; **неэконо́мное расхо́дование де́нег** аҡсаны әрәм-шәрәм итеү

**НЕЭТИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое әҙәпһеҙ, әхлаҡһыҙ; **неэти́чный посту́пок** әҙәпһеҙ ҡылыҡ

**НЕЯ́ВКА** *ж* килмәү; **нея́вка свиде́телей** шаһиттарҙың килмәүе

**НЕЯ́ВСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое асыҡ күренмәгән (ишетелмәгән), насар ишетелгән, аңлайышһыҙ; **нея́вственные зву́ки** асыҡ ишетелмәгән тауыштар

**НЕЯ́СНОСТЬ** *ж* аңлайышһыҙлыҡ, аңлайышһыҙ булыу, аныҡһыҙлыҡ, аныҡ (аңлайышлы) булмау; **нея́сность слов** һүҙҙәрҙең аңлайышһыҙлығы

**НЕЯ́СНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аңлайышһыҙ; **нея́сная мысль** аңлайышһыҙ фекер **2.** асыҡ булмаған (күренмәгән), һиҙелер-һиҙелмәҫ, беленер-беленмәҫ, тоноҡ; **нея́сные ли́нии** беленер-беленмәҫ һыҙыҡтар

**НЕЯ́СЫТЬ** *ж* һоро өкө

**НИ I** *частица* и *союз* **1.** *частица* (*для указания на полное отсутствие чего-л. или для усиления отрицания*) ғына/генә, да/дә; **не**

**встре́тил ни одного́ челове́ка** бер генә кешене лә осратманым; **в ведре́ нет ни одно́й ка́пли воды́** биҙрәлә бер тамсы ла һыу юҡ

**2.** *частица* (*для усиления утвердительного смысла глагола, с которым употребляется*) -ма/-мә, ғына/генә, -һын/-һен, ла/лә; **кого́ ни встре́тишь, все об э́том говоря́т** кемде генә осратма, бөтәһе лә ошо турала һөйләй

**3.** *союз* (*для усиления отрицания при перечислении однородных членов*) да/дә, ҙа/ҙә, ла/лә, та/тә; **на не́бе ни ме́сяца, ни звёзд** күк йөҙөндә ай ҙа, йондоҙҙар ҙа юҡ ♦ **ни жив ни мёртв** ҡото осҡан *кемдең*; **ни отве́та ни приве́та** *от кого* өнө лә, тыны ла юҡ; **ни то ни сё** ни аллаға, ни муллаға; ни ите, ни һөтө; **ни два ни полтора́** ни ары, ни бире; **ни-ни́!**; **ни-ни-ни́!**: 1) һис тә ярамай!; 2) һис тә юҡ!, һис тә түгел!; **ни гу-гу́**; **ни сло́ва** ауыҙыңды ла асма; **ни ша́гу** бер аҙым да атлама

**НИ II** (*в сочет. с предлогами является отделяемой частью мест. "никто", "ничто", "никакой", "ничей"*) һис бер, бер да/дә; **ни с ке́м не сове́товаться** бер кем менән дә кәңәшләшмәү

**-НИБУДЬ** *частица* (*вносит значение неопределённости*) да/дә булһа; **кто́-нибудь** кем дә булһа; **что́-нибудь** ни ҙә булһа, нимә лә булһа

**НИ́ВА** *ж* **1.** баҫыу, ҡыр; **зелёные ни́вы** йәшел баҫыуҙар **2.** *чего, какая*; *перен., высок.* майҙан, юл, өлкә; **труди́ться на ни́ве просвеще́ния** мәғариф өлкәһендә хеҙмәт итеү

**НИВЕЛИ́Р** *м*; *геод.* нивелир (*прибор*)

**НИВЕЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов.* **1.** *что*; *геод.* нивелирлау; **нивели́ровать ме́стность** урынды нивелирлау **2.** *кого-что*; *перен., книжн.* (*уравнять*) тигеҙләү, айырмаһын күрһәтмәү (бөтөрөү); **нивели́ровать осо́бенности** үҙенсәлектәр араһындағы айырманы күрһәтмәү

**НИВЕЛИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов., несов.*; *книжн.* тигеҙләнеү, айырма күренмәү (бөтөү); **нивели́ровались разли́чия** айырмалар бөткән **2.** *только несов. страд. от* **нивели́ровать**

**НИВЕЛИРО́ВКА** *ж* **1.** *геод. см.* **нивели́ровать** 1; **2.** *книжн. см.* **нивели́ровать** 2, **нивели́роваться** 1

**НИВЕЛИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *геод.* нивелирлау ...ы; **нивелиро́вочная ре́йка** нивелирлау рейкаһы

**НИВЕЛИРО́ВЩИК** *м* и **НИВЕЛИРО́ВЩИЦА** *ж* нивелирлау оҫтаһы, нивелирлаусы

**НИ́ВХИ** *мн.* нивхтар, нивх халҡы (*Амур йылғаһының түбәнге өлөшөндә һәм Сахалин утрауында йәшәгән халыҡ*) // *ед.* **нивх** *м* нивх ир-аты; **ни́вхка** *ж* нивх ҡатын-ҡыҙы

**НИ́ВХСКИЙ,** -ая, -ое нивх ...ы; **ни́вхский язы́к** нивх теле

**НИГДЕ́** *нареч.* бер ҡайҙа ла, бер ерҙә лә, бер урында ла, бер (һис) ҡайҙа; **его́ нет нигде́** ул бер ерҙә лә юҡ

**НИГИЛИ́ЗМ** *м* нигилизм (**1.** *XIX б. 60-сы йй. Рәсәйҙә дворян ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡырҡа ҡаршы сығыусы интеллигент-разночинецтар йүнәлеше* **2.** *дөйөм ҡабул ителгән нормаларҙы инҡар итеү, ҡабул итмәү*)

**НИГИЛИ́СТ** *м* и **НИГИЛИ́СТКА** *ж* нигилист, нигилизмды яҡлаусы

**НИГИЛИСТИ́ЧЕСКИЙ** и **НИГИЛИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое нигилистик, нигилистарса; **нигилисти́ческие взгля́ды** нигилистик ҡараштар

**НИГРОЗИ́Н** *м* нигрозин (*ҡара буяу*)

**НИГРО́Л** *м*; *хим.* нигрол (*нефть продукты*)

**НИДЕРЛА́НДСКИЙ,** -ая, -ое нидерланд ...ы, Нидерландия...ы; **нидерла́ндский язы́к** нидерланд теле

**НИДЕРЛА́НДЦЫ** *мн.* нидерландтар, нидерланд халҡы // *ед.* **нидерла́ндец** *м* нидерланд ир-аты; **нидерла́ндка** *ж* нидерланд ҡатын-ҡыҙы

**НИ́ЖЕ 1.** *сравн. ст. от* **ни́зкий** и **ни́зко** түбәнерәк, тәпәшерәк; **сара́й ни́же до́ма** һарай өйҙән тәпәшерәк **2.** *нареч.* түбәнерәк, аҫтараҡ, түбәнгәрәк, аҫҡараҡ; **смотри́ ни́же** аҫҡараҡ ҡара **3.** *предлог с род. п.* (*за пределами чего-л. по направлению вниз*) түбән; **моро́з на пять гра́дусов ни́же нуля́** һалҡынлыҡ нулдән биш градус түбән ♦ **ни́же досто́инства** *чьего кемдер өсөн* түбәнселек (булыу, күрһәтеү); **ни́же (вся́кой) кри́тики** иғтибарға лайыҡ түгел, телгә лә алырлыҡ түгел

**НИЖЕПОДПИСА́ВШИЙСЯ,** -аяся, -ееся *книжн.* түбәндә ҡул ҡуйған; **нижеподписа́вшиеся чле́ны коми́ссии** түбәндә ҡул ҡуйған комиссия ағзалары

**НИЖЕСКА́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* түбәндә әйтелгән; **нижеска́занные слова́** түбәндә әйтелгән һүҙҙәр

**НИЖЕСЛЕ́ДУЮЩИЙ,** -ая, -ее *книжн.* түбәндәге; **нижесле́дующее указа́ние** түбәндәге күрһәтмә

**НИЖЕСТОЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее түбәнге; **нижестоя́щая организа́ция** түбәнге ойошма

**НИЖЕУКА́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* түбәндә күрһәтелгән; **нижеука́занное положе́ние** түбәндә күрһәтелгән положение

**НИЖЕУПОМЯ́НУТЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* түбәндә әйтелгән (иҫкә алынған); **нижеупомя́нутый слу́чай** түбәндә иҫкә алынған ваҡиға (осраҡ)

**НИ́ЖНИЙ,** -яя, -ее **1.** түбәнге, аҫҡы; **ни́жний эта́ж** аҫҡы ҡат **2.** эске; **ни́жнее бельё** эске кейем **3.** түбән, түбәнге; **ни́жнее тече́ние реки́** йылғаның түбәнге ағымы ♦ **ни́жняя пала́та** *полит.* түбәнге палата (*парламентта*)

**НИЗ** *м* **1.** (*нижняя часть*) түбән, аҫ, түбәнге (аҫҡы) өлөш, түбән (аҫ) яҡ; **низ ваго́нов** вагондарҙың аҫты **2.** *мн.* **низы́**; *разг.* (*низшие слои общества*) түбән(ге) ҡатлам, иҙелеүсе синыфтар;

**опира́ться на низы́ о́бщества** йәмғиәттең түбән ҡатламдарына таяныу **3.** *мн.* **низы́**; *муз.* түбән (ҡалын) тауыштар

**НИЗ...** (**нис...**) *приставка*; *хәрәкәттең аҫҡа* (*түбәнгә*) *ҡарай йүнәлешен күрһәтә*, *мәҫ.*, **низве́ргнуть** өҫтән аҫҡа ташлау; **низри́нуться** аҫҡа ташланыу

**НИЗА́ТЬ** *несов.* теҙеү (*епкә*, *тимерсыбыҡҡа һ.б.*); **низа́ть бу́сы** мунсаҡ теҙеү

**НИЗА́ТЬСЯ** *несов.* теҙелеү; **из же́мчуга ни́жется ожере́лье** ынйынан мунсаҡ теҙелә

**НИЗВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **низве́ргнуть**

**НИЗВЕРГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **низве́ргнуться**; **с высоты́ низверга́ется во́дный пото́к** юғарынан һыу шарлауығы шарлап төшә **2.** *страд. от* **низверга́ть**

**НИЗВЕ́РГНУТЬ** *сов.*; *книжн.* **1.** *что* атып бәреү, аҡтарып (тәгәрләтеп) ырғытыу (төшөрөү), аҫҡа ташлау; **низве́ргнуть ка́мни с горы́** тауҙан таштар тәгәрләтеп төшөрөү **2.** *перен.* ҡолатыу, ҡолатып (бәреп) төшөрөү; **низве́ргнуть прави́тельство** хөкүмәтте бәреп төшөрөү

**НИЗВЕ́РГНУТЬСЯ** *сов.*; *книжн.* аҡтарылып (ауып) төшөү

**НИЗИ́НА** *ж* уйһыу (уйпат) ер

**НИЗИ́ННЫЙ**, -ая, -ое уйһыу, уйпат; **низи́нные луга́** уйһыу болондар

**НИ́ЗКИЙ**, -ая, -ое **1.** (*невысокий*) тәбәнәк, тәпәш; **челове́к ни́зкого ро́ста** тәбәнәк буйлы кеше **2.** (*небольшой*) түбән; **ни́зкие це́ны** түбән хаҡ(тар) **3.** (*плохой по качеству*) түбән; **си́тец ни́зкого ка́чества** түбән сифатлы ситса **4.** (*бесчестный*) алама, яман, түбән; **ни́зкий посту́пок** яман ҡылыҡ **5.** (*неродовитый*) түбән, түбән(ге) (ҡатлам); **ни́зкое сосло́вие** түбән ҡатлам **6.** *муз.* ҡалын; **ни́зкий го́лос** ҡалын тауыш ♦ **ни́зкий покло́н** түбәнселек менән (ололап) баш эйеү

**НИ́ЗКО** *нареч.* **1.** түбән, түбәндән; **опусти́ться ни́зко** түбән төшөү **2.** түбән, намыҫһыҙ; **поступи́ть ни́зко** намыҫһыҙ ҡылыҡ ҡылыу **3.** ҡалын; **го́лос звучи́т ни́зко** тауыш ҡалын булып сыға ♦ **ни́зко кла́няться** түбәнселек менән (ололап) баш эйеү

**НИЗКОВО́ЛЬТНЫЙ**, -ая, -ое түбән вольтлы; **низково́льтная дуга́** түбән вольтлы дуға

**НИЗКОЛЕГИ́РОВАННЫЙ**, -ая, -ое аҙ ҡатыштырылған (ҡушылған); **низколеги́рованная сталь** башҡа металдар аҙ ҡатыштырылған ҡорос

**НИЗКООПЛА́ЧИВАЕМЫЙ**, -ая, -ое түбән хаҡлы; **низкоопла́чиваемая рабо́та** түбән хаҡлы эш

**НИЗКОПОКЛО́ННИК** *м* ярамһаҡланыусы, ялағай, юха, эпкәләй; **презира́ть низкопокло́нника** ялағайға ерәнеп ҡарау

**НИЗКОПОКЛО́ННИЧАТЬ** *несов.* ярамһаҡланыу, ялағайланыу, эпкәләйләнеү

**НИЗКОПОКЛО́НСТВО** и **НИЗКОПОКЛО́ННИЧЕСТВО** *с* ярамһаҡлыҡ, ялағайлыҡ, тәрилкә тотоу, эпкәләйлек

**НИЗКОПОКЛО́НСТВОВАТЬ** *несов. см.* **низкопокло́нничать**

**НИЗКОПРО́БНЫЙ**, -ая, -ое **1.** (*о золоте, серебре*) түбән пробалы; **низкопро́бное серебро́** түбән пробалы көмөш **2.** *перен.*, *разг.* (*плохой*) насар, түбән сифатлы; **низкопро́бный расска́з** насар ғына хикәйә

**НИЗКОРО́СЛЫЙ**, -ая, -ое тәбәнәк, ҡыҫҡа буйлы, тәпәш, ҡарһаҡ; **низкоро́слое де́рево** тәпәш ағас; **низкоро́слый челове́к** ҡарһаҡ кеше

**НИЗКОСО́РТНЫЙ**, -ая, -ое түбән сортлы (сифатлы); **низкосо́ртная ткань** түбән сифатлы туҡыма

**НИЗЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **низложи́ть**

**НИЗЛАГА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **низлага́ть**

**НИЗЛОЖИ́ТЬ** *сов.*; *книжн.* **1.** *кого* тәхеттән ҡолатыу, (власть башынан) төшөрөү; **низложи́ть президе́нта** президентты (властан) төшөрөү **2.** *что*; *перен.* төшөрөү; **низложи́ть авторите́т** *чей-л. берәйһенең* абруйын төшөрөү

**НИ́ЗМЕННОСТЬ** *ж* **1.** уйһыулыҡ; **приозёрная ни́зменность** күл буйындағы уйһыулыҡ **2.** *перен.* түбәнлек, әшәкелек; **ни́зменность жела́ний** теләктәрҙең түбәнлеге

**НИ́ЗМЕННЫЙ**, -ая, -ое **1.** уйһыу, уйпат; **ни́зменная ме́стность** уйһыу ер **2.** *перен.* түбән, әшәке; **ни́зменные побужде́ния** әшәке ниәттәр

**НИЗОВО́Й**, -ая, -ое **1.** түбәндән иҫкән, түбән ерҙәрҙә үҫкән, түбәндә булған; **низово́й ве́тер** түбәндән иҫкән ел; **низова́я трава́** түбән ерҙәрҙә үҫә торған үлән **2.** йылға тамағына яҡын урынлашҡан; **низовы́е города́** йылға тамағына яҡын урынлашҡан ҡалалар **3.** түбәнге, башланғыс; **низовы́е организа́ции** түбәнге ойошмалар **4.** урындағы; **низова́я печа́ть** урындағы матбуғат

**НИЗО́ВЬЕ** *с* түбәнге ағым (яҡ, өлөш), тамаҡ; **низо́вье реки́** йылға тамағы

**НИЗО́К** *м*; *спец.* аҫты, аҫҡы өлөшө, осо; **низо́к шка́фа** шкаф аҫты; **низки́ брю́к** салбар балағының осо

**НИ́ЗОМ** *нареч.* аҫтан, түбәндән, аҫҡы юл менән; **е́хать ни́зом** аҫҡы юл менән барыу

**НИ́ЗОСТЬ** *ж* аламалыҡ, яманлыҡ, әшәкелек, ҡәбәхәтлек; **ни́зость соде́янного** эшләнгән эштең әшәкелеге

**НИ́ЗШИЙ**, -ая, -ее **1.** *превосх. ст. от* **ни́зкий** 2, 3 иң түбән; **ни́зший сорт** иң түбән сорт **2.** (*простейший*) түбән төҙөлөшлө; **ни́зшие расте́ния** түбән төҙөлөшлө үҫемлектәр **3.** (*младший по положению*) түбән; **ни́зшее зва́ние** түбән дәрәжә **4.** (*начальный — об образовании*) башланғыс; **ни́зшее образова́ние** башланғыс белем **5.** (*неродовитый*) түбән; **ни́зшее сосло́вие** түбән ҡатлам

**НИКА́К I** *нареч.* бер нисек тә, һис тә, һис бер; **ника́к не могу́ засну́ть** бер нисек тә йоҡлап китә алмайым ♦ **ника́к нет** һис тә юҡ, һис тә түгел (*түбәнселек менән яуап биргәндә*)

**НИКА́К II** *частица*; *прост.* (*кажется, как будто*) әллә, ахырыһы, буғай; **ты заболе́л ника́к?** һин әллә ауырып киттең?

**НИКАКО́Й,** -ая, -ое *мест.* **1.** (*ни один*) һис тә, һис бер, (һис) бер ниндәй (ҙә), һис бер төрлө, бер төрлө лә; **нет никако́го сомне́ния** бер ниндәй ҙә шик юҡ; **он никако́й не врач** ул һис тә врач түгел **2.** *в знач. прил.*; *разг.* (*плохой*) бер нәмәгә яраҡһыҙ, бер нигә лә ярамай торған, насар, эшкинмәгән; **шахмати́ст он никако́й** ул бер нәмәгә яраҡһыҙ шахматсы ♦ **без никаки́х!**; **и (бо́льше) никаки́х!** әйткән-бөткән!, бөттө-китте!; **никако́й не** һис тә түгел; **никаки́х гвозде́й** *см.* **гвоздь**

**НИ́КЕЛЕВЫЙ,** -ая, -ое никель ...ы; **ни́келевая руда́** никель мәғдәне

**НИКЕЛИ́Н** *м* никелин (**1.** *мин. никелле ҡыҙыл колчедан* **2.** *баҡыр, никель һәм марганец иретмәһе*)

**НИКЕЛИРОВА́НИЕ** *с см.* **никелирова́ть**

**НИКЕЛИРО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **никелирова́ть 2.** *прил.* никелле, никель йүгертелгән (ялатылған); **никелиро́ванные ло́жки** никель йүгертелгән ҡалаҡтар

**НИКЕЛИРОВА́ТЬ** *сов., несов. что* никелләү, никель йүгертеү (ялатыу); **никелирова́ть дета́ли** деталдәрҙе никелләү

**НИКЕЛИРОВА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **никелирова́ть**

**НИКЕЛИРО́ВКА** *ж см.* **никелирова́ть**

**НИКЕЛИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое никелләй торған, никелләү ...ы; **никелиро́вочные рабо́ты** никелләү эштәре

**НИ́КЕЛЬ** *м* никель (*химик элемент, металл*)

**НИ́КЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һулыған, һалынған, шиңгән; **ни́клая трава́** шиңгән үлән

**НИ́КНУТЬ** *несов.* **1.** һалыныу, шиңеү, шиңеп һалынып төшөү, һулыу, бөгөлөү; **трава́ ни́кнет** үлән һулый **2.** *перен.* кәмеү, бөтә (кәмей) барыу; **свет ни́кнет** яҡтылыҡ кәмей бара

**НИКОГДА́** *нареч.* һис бер ваҡытта ла, (һис) бер ҡасан да; **он никогда́ бо́льше не прие́дет** ул башҡа бер ҡасан да килмәйәсәк ♦ **как никогда́** бер ваҡытта ла булмағандай

**НИКО́Й: нико́им о́бразом** (һис) бер нисек тә, бер нисек итеп тә, һис бер хәлдә лә

**НИКОТИ́Н** *м* никотин (*тәмәкеләге ағыулы матдә*)

**НИКОТИ́ННЫЙ** и **НИКОТИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое никотин ...ы; **никоти́нный за́пах** никотин еҫе; **никоти́новая кислота́** никотин кислотаһы

**НИКТО́** *мест.* **1.** (*ни один*) бер кем дә, һис кем дә, берәү ҙә; **никто́ не приходи́л** бер кем дә килмәне **2.** *в знач. сущ.* **никто́** *м нескл.*; *разг.* бер кем дә түгел, туған тейешле түгел; **он мне никто́** ул минең бер кемем дә түгел

**НИКУДА́** *нареч.* бер ҡайҙа ла, бер ергә лә, һис ҡайҙа; **никуда́ он не пойдёт** ул бер ергә лә бармаясаҡ ♦ **никуда́ не го́дный** бер нәмәгә лә яраҡһыҙ (эшкинмәй, ярамай); **никуда́ не годи́тся** бер нәмәгә лә ярамай

**НИКУДЫ́ШНЫЙ,** -ая, -ое *прост.* бер нәмәгә (лә) яраҡһыҙ, насар; **никуды́шная рабо́та** бер нәмәгә (лә) яраҡһыҙ эш

**НИКЧЁМНОСТЬ** *ж*; *разг.* файҙаһыҙ (кәрәкһеҙ) булыу, яраҡһыҙлыҡ; **никчёмность разгово́ров** һөйләшеү(ҙәр)ҙең файҙаһыҙ булыуы

**НИКЧЁМНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* файҙаһыҙ, кәрәкһеҙ, яраҡһыҙ, кәрәкмәгән, кәрәге булмаған; **никчёмная рабо́та** кәрәге булмаған эш

**НИМА́ЛО** *нареч.* һис тә, бер ҙә, аҙ ғына ла, саҡ ҡына ла; **э́то собы́тие нима́ло его́ не удиви́ло** был ваҡиға уны һис тә ғәжәпләндермәне

**НИМБ** *м* нимб (*иконаларҙағы, антик һындарҙың башы тирәһендәге түңәрәк нур*)

**НИ́МФА** *ж* нимфа (*грек мифологияһында тәбиғәт көстәрен кәүҙәләндергән ҡатын ҡиәфәтендәге алла*); **речна́я ни́мфа** йылға нимфаһы

**НИОТКУ́ДА** *нареч.* бер ҡайҙан да, бер ерҙән дә, һис ҡайҙан, һис бер ерҙән; **ниотку́да не жду весте́й** бер ерҙән дә хәбәр(ҙәр) көтмәйем

**НИПОЧЁМ** *нареч. в знач. сказ.*; *разг.* бер ни түгел (тормай), зарарһыҙ, зарары (зыяны) юҡ; **моро́зы ему́ нипочём** уның өсөн һыуыҡ бер ни түгел

**НИ́ППЕЛЬ** *м* ниппель (*металл көбәк*); **велосипе́дный ни́ппель** велосипед ниппеле

**НИ́ППЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ниппель ...ы; **ни́ппельная часть радиа́тора** радиаторҙың ниппель өлөшө

**НИС...** *приставка см.* **низ...**

**НИСКО́ЛЬКО** *нареч.* бер ҙә, һис тә; **он ниско́лько не уста́л** ул бер ҙә арымаған

**НИСПАДА́ТЬ** *несов.*; *книжн.* һалынып төшөү (тороу)

**НИСПРОВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **ниспрове́ргнуть**

**НИСПРОВЕРГА́ТЬСЯ** *несов. страд. от* **ниспроверга́ть**

**НИСПРОВЕ́РГНУТЬ** *сов.*; *книжн.* **1.** ауҙарыу, ауҙарып (түбән) төшөрөү; **ниспрове́ргнуть ста́тую** статуяны ауҙарыу **2.** *перен.* (*свергнуть*) власть башынан төшөрөү, ҡолатыу, абруйын төшөрөү; **ниспрове́ргнуть реакционе́ров** реакционерҙарҙы ҡолатыу

**НИСТА́ГМ** *м*; *мед.* нистагм (*күҙ алмаһының бер яҡтан икенсе яҡҡа йыш-йыш ихтыярһыҙ хәрәкәт итеүе*)

**НИСХОДЯ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **нисходи́ть 2.** *прил.* (ҙурҙан бәләкәйгә табан) кәмеп барған, төшә (түбәнәйә) барыусы ♦ **нисходя́щее ударе́ние** *лингв.* түбәнәйә барыусы баҫым

**НИТЕВИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое еп һымаҡ (кеүек), епкә оҡшаған; **нитеви́дный червь** еп һымаҡ селәүсен

**НИ́ТКА** *ж* **1.** еп; **ни́тка с иго́лкой** энә менән еп **2.** *чего, какая* теҙмә, еп; **две ни́тки же́мчуга** ике теҙмә ынйы ♦ **до (после́дней) ни́тки** бөтөнләй, тулыһынса; **до после́дней ни́тки обобра́ть** бер нәмәһеҙ ҡалдырыу, талап (алдап) алып бөтөрөү; **до ни́тки сбере́чь** тулыһынса һаҡлау; **до ни́тки промо́кнуть** лыс һыу булыу, ҡоро ер ҡалмау

**НИ́ТОЧКА** *ж; уменьш. от* **ни́тка** и **нить** ҡыҫҡа (нәҙек) еп ♦ **по ни́точке разобра́ть** энәһенән ебенә (тиклем) тикшереү

**НИ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое еп, еп ...ы; **ни́точное произво́дство** еп етештереү

**НИТРА́Т** *м; хим.* нитрат (*азот кислотаһының тоҙо*)

**НИТРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое нитратлы; **нитра́тные солончаки́** нитратлы татырлауыҡ

**НИТРИ́Т** *м; хим.* нитрит (*азотлы кислотаның тоҙо*)

**НИТРОГЛИЦЕРИ́Н** *м; мед., хим.* нитроглицерин (*глицеринға азот һәм көкөрт кислоталары ҡушып яһалған май һымаҡ шыйыҡса*)

**НИТРОГЛИЦЕРИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое нитроглицеринлы ...ы; **нитроглицери́новый по́рох** нитроглицеринлы дары

**НИ́ТЧАТЫЙ,** -ая, -ое *бот., зоол.* еп һымаҡ, епкә оҡшаған; **ни́тчатый червь** еп һымаҡ селәүсен

**НИТЬ** *ж* **1.** еп; **капро́новая нить** капрон еп **2.** *чего, какая* еп, теҙмә; **кора́лловая нить** мәрйен еп **3.** *чего; перен.* теҙмә, еп, юл; **ни́ти дру́жбы** дуҫлыҡ ептәре; **нить жи́зни** тормош юлы; **нить воспомина́ний** иҫтәлектәр теҙмәһе

**НИ́ТЯНЫЙ,** -ая, -ое еп, ептән эшләнгән (һуғылған, бәйләнгән); **ни́тяные перча́тки** ептән бәйләнгән бирсәткә

**НИЦ** *нареч.; книжн.* йөҙ түбән; **пасть ниц** йөҙ түбән йығылыу

**НИЧЕГО́** *нареч.; разг.* **1.** (*довольно сносно*) ярайһы ғына, арыу ғына, **она́ учи́лась ничего́** ул яҡшы ғына уҡыны **2.** *в знач. сказ.* (*довольно хорошо*) *разг.* яман түгел, ярайһы ғына; **дом у него́ ничего́** уның йорто ярайһы ғына **3.** *в знач. сказ.* (*всё равно*) зарар юҡ, барыбер, ярай, ярар; **пусть придёт, ничего́** килә бирһен, зарар юҡ ♦ **ничего́ подо́бного** һис тә улай түгел

**НИЧЕГОНЕДЕ́ЛАНИЕ** *с; разг.* бушҡа ваҡыт уҙғарыу, эшләмәү, эшһеҙ ятыу, эт һуғарыу

**НИЧЕ́Й,** -ья, -ьё *мест.* **1.** (*никому не принадлежащий*) бер кемдеке (берәүҙеке) лә түгел, эйәһеҙ, хужаһыҙ; **э́ти ве́щи ничьи́** был нәмәләр бер кемдеке лә түгел **2.** (*чей бы то ни было*) (һис) бер кемдең дә, берәүҙең дә; **не ну́жно ничьи́х сове́тов** бер кемдең дә кәңәше кәрәк түгел **3.** *в знач. сущ.* **ничья́** *ж; спорт.* бер яҡтың да еңмәүе; **согласи́ться на ничью́** бер яҡтың да еңмәүенә килешеү

**НИЧЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **ниче́й** 2, 3

**НИЧКО́М** *нареч.* йөҙ түбән; **лечь ничко́м** йөҙ түбән ятыу

**НИЧТО́** *мест.* **1.** (*ни один, никакой предмет*) бер нәмә лә, бер ни ҙә, һис нәмә, һис бер нәмә, һис ни; **его́ ничто́ не интересу́ет** уны бер нәмә лә ҡыҙыҡһындырмай; **ни о чём не ду́мать** бер нәмә тураһында ла уйламау **2.** *в знач. сущ.* **ничто́** *с нескл.* бер кем дә түгел, бер нәмә лә түгел; **он по сравне́нию с други́ми ничто́** ул, башҡалар менән сағыштырғанда, бер кем дә түгел ♦ **ничего́ не зна́чить** бер нәмәгә лә тормау; **ничего́ не поде́лаешь** бер ни ҙә эшләп булмай; **ничего́ не ска́жешь** бер ни ҙә әйтеп булмай; **ничего́ не сто́ит** *с неопр.* бер ни түгел, бик анһат; **из ничего́ (сде́лать, получи́ть и т.п.)** юҡтан бар итеү; **ни во что не ста́вить (счита́ть)** *кого бер кем менән* иҫәпләшмәү, *бер кемде* һанламау, (ихтирам итмәү); **ни за что** бөтөнләй, бер ҡасан да, һис тә; **ни к чему́** кәрәге юҡ; **ни при чём** ҡатнашы (ҡыҫылышы) юҡ; **ни с чем уйти́ (оста́ться, верну́ться и т.п.)** буш (бер ниһеҙ) китеү (ҡалыу, ҡайтыу һ.б.)

**НИЧТО́ЖЕ: ничто́же сумня́ся (сумня́шеся)** *шутл.* һис тә икеләнмәйенсә, шикләнмәйенсә

**НИЧТО́ЖЕСТВО** *с* **1.** түбәнлек; **ничто́жество мы́слей** уйҙарҙың түбәнлеге **2.** түбән (ваҡсыл) кеше, меҫкен

**НИЧТО́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** бик бәләкәй (аҙ, ваҡ, әһәмиәтһеҙ) булыу; **ничто́жность су́ммы** аҡсаның бик аҙ булыуы **2.** *см.* **ничто́жество** 2

**НИЧТО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*очень малый*) бик бәләкәй, кескәй, бик аҙ (ваҡ); **ничто́жные поте́ри** бик аҙ юғалтыуҙар **2.** (*незначительный*) бик бәләкәй, ваҡ, әһәмиәтһеҙ, юҡ дәрәжәһендә; **ничто́жный вопро́с** әһәмиәтһеҙ мәсьәлә **3.** (*жалкий — о человеке*) түбән, меҫкен; **ничто́жный челове́к** түбән кеше

**НИЧУ́ТЬ** *нареч.; разг.* саҡ ҡына ла, аҙ ғына ла, бер ҙә, һис тә; **ничу́ть не оби́делся** ул саҡ ҡына ла үпкәләмәне ♦ **ничу́ть не быва́ло** һис юҡ, һис улай түгел

**НИ́ША** *ж* ниша (*стеналағы уйым*)

**НИЩА́ТЬ** *несов.* хәйерселәнеү, бөлгөнлөккә төшөү, фәҡирләнеү

**НИ́ЩЕНКА** *ж* хәйерсе, теләнсе

**НИ́ЩЕНСКИЙ,** -ая, -ое **1.** ярлы, фәҡир; **ни́щенское существова́ние** фәҡир йәшәү **2.** *перен.* (*ничтожно малый*) бик бәләкәй; **ни́щенская зарпла́та** бик бәләкәй эш хаҡы

**НИ́ЩЕНСТВО** *с* **1.** хәйерселек, теләнселек, фәҡирлек; **жить ни́щенством** хәйерселектә йәшәү **2.** хәйерселек; **го́ды ни́щенства** хәйерселек йылдары

**НИ́ЩЕНСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** хәйерселәү, хәйер һорау **2.** ярлылыкта (хәйерселектә) йәшәү; **ни́щенствовать до́лго** хәйерселектә оҙаҡ йәшәү

**НИЩЕТА́** *ж* **1.** хәйерселек, ярлылыҡ; **жить в нищете́** хәйерселектә йәшәү **2.** *перен.* ярлылыҡ; **духо́вная нищета́** рухи ярлылыҡ **3.** *собир.* ярлылар, фәҡирҙәр, хәйерселәр

**НИ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** хәйерсе; **ни́щий стари́к** хәйерсе ҡарт **2.** *в знач. сущ.* **ни́щий** *м* и **ни́щая** *ж* хәйерсе, хәйер һорап йәшәүсе **3.** (*бедный*) ярлы; **ни́щее сосло́вие** ярлы ҡатлам **4.** *перен.* ярлы; **ни́щие ду́хом** рухи яҡтан ярлылар

**ОБЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йүгереп әйләнеп сығыу; **обежа́ть вокру́г до́ма** өй тирәһен йүгереп әйләнеп сығыу **2.** *кого-что*; *разг.* йүгереп уҙып китеү **3.** *кого-что* йүгереп (әйләнеп, урап) йөрөп сығыу, ҡыҙырып сығыу; **обежа́ть всех ро́дственников** бөтә туғандарҙы йөрөп сығыу; **обежа́ть все магази́ны** барлыҡ магазиндарҙы ҡыҙырып сығыу ♦ **обежа́ть глаза́ми (взгля́дом)** күҙ йүгертеп сығыу

**ОБЕЗ... (обес...)** *приставка*; *берәй нәмәнән мәхрүм итеү, айырыу, ҡотҡарыу йәки мәхрүм булыу, айырылыу, ҡотолоу мәғәнәләрен аңлата, мәҫ.*, **обезземе́лить** ерһеҙ ҡалдырыу; **обезво́дить** һыуһыҙ итеү; **обезопа́сить** хәүефтән ҡотҡарыу; **обеспа́мятеть** хәтерһеҙләнеү, хәтерҙе юғалтыу

**ОБЕЗБО́ЛИВАНИЕ** *с* *см.* **обезбо́ливать**

**ОБЕЗБО́ЛИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезбо́лить**

**ОБЕЗБО́ЛИВАЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич.* *от* **обезбо́ливать 2.** *прил.* ауыртыуҙы баҫа (бөтөрә) торған; **обезбо́ливающие сре́дства** ауыртыуҙы баҫа торған дарыу(ҙар)

**ОБЕЗБО́ЛИТЬ** *сов.* *что* ауыртыуҙы баҫыу (бөтөрөү); **обезбо́лить зуб** тештең ауыртыуын баҫыу

**ОБЕЗВО́ДИТЬ** *сов.* *что* һыуһыҙ ҡалдырыу, һыуын ҡоротоу (бөтөрөү), һыуһыҙландырыу; **обезво́дить жир** *спец.* майҙы һыуһыҙландырыу

**ОБЕЗВО́ЖИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезво́дить**

**ОБЕЗВРЕ́ДИТЬ** *сов.* *кого-что* зарарһыҙландырыу, зыянһыҙландырыу; **обезвре́дить ми́ну** минаны зарарһыҙландырыу

**ОБЕЗВРЕ́ЖИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезвре́дить**

**ОБЕЗГЛА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого* башын өҙөү (киҫеп, сабып ташлау) **2.** *что*; *перен.* етәксеһеҙ (башлыҡһыҙ) ҡалдырыу; **обезгла́вить восста́ние** ихтилалды етәксеһеҙ ҡалдырыу

**ОБЕЗГЛА́ВЛИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезгла́вить**

**ОБЕЗДО́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **обездо́лить 2.** *прил.* иҙелгән, йәберләнгән, мәхрүм ителгән

**ОБЕЗДО́ЛИТЬ** *сов.* *кого-что* мәхрүм итеү, өлөшһөҙ ҡалдырыу

**ОБЕЗЖИ́РИВАНИЕ** *с* *см.* **обезжи́ривать**

**ОБЕЗЖИ́РИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезжи́рить**

**ОБЕЗЖИ́РИТЬ** *сов.* *что* майһыҙландырыу, майын бөтөрөү (сығарыу, айырыу); **обезжи́рить шерсть** йөндөң майын бөтөрөү; **обезжи́рить тво́рог** эремсектең майын сығарыу

**ОБЕЗЗАРА́ЖИВАНИЕ** *с* *см.* **обеззара́живать**; **обеззара́живание питьево́й воды́** эсәр һыуҙы зарарһыҙландырыу

**ОБЕЗЗАРА́ЖИВАТЬ** *несов.* *см.* **обеззара́зить**

**ОБЕЗЗАРА́ЗИТЬ** *сов.* *что* йоғошһоҙландырыу, зарарһыҙландырыу; **обеззара́зить зе́млю** ерҙе зарарһыҙландырыу; **обеззара́зить семена́** орлоҡто зарарһыҙландырыу

**ОБЕЗЗЕМЕ́ЛИВАНИЕ** *с* *см.* **обезземе́ливать**

**ОБЕЗЗЕМЕ́ЛИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезземе́лить**

**ОБЕЗЗЕМЕ́ЛИТЬ** *сов.* ерһеҙ ҡалдырыу, ерҙән яҙҙырыу (мәхрүм итеү); **обезземе́лить крестья́нина** крәҫтиәнде ерһеҙ ҡалдырыу

**ОБЕЗЛЕ́СЕТЬ** *сов.* урманы ҡырҡылып бөтөү, урманһыҙ ҡалыу (итеү)

**ОБЕЗЛЕ́СИТЬ** *сов.* *что* урманһыҙ ҡалдырыу, урманын (киҫеп) бөтөрөү; **обезле́сить край** тирә-яҡтың урманын ҡырҡып бөтөрөү

**ОБЕЗЛИ́ЧЕНИЕ** *с* *см.* **обезли́чить**, **обезли́читься**

**ОБЕЗЛИ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* *от* **обезли́чить 2.** *прил.* (*лишённый индивидуальности*) үҙенсәлектәрен (шәхсиәтен) юғалтҡан, үҙенсәлектәре юйылған **3.** *прил.* эйәһеҙ, хужаһыҙ, яуап биреүсеһе булмаған, айырым кешегә беркетелмәгән; **обезли́ченная рабо́та** айырым кешегә беркетелмәгән эш

**ОБЕЗЛИ́ЧИВАТЬ** *несов.* *см.* **обезли́чить**

**ОБЕЗЛИ́ЧИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* шәхси үҙенсәлектәрен (шәхсиәтен) бөтөрөү; **обезли́чить челове́ка** кешенең шәхси үҙенсәлектәрен бөтөрөү **2.** *что* яуап биреүсеһеҙ ҡалдырыу, айырым ке-

шегә беркетмәү; **обезли́чить руково́дство** етәкселек итеүҙе айырым кешегә беркетмәү

**ОБЕЗЛИ́ЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** шәхси үҙенсәлектәре бөтөү (юйылыу, юҡҡа сығыу) **2.** яуап биреүсеһеҙ (эйәһеҙ) ҡалдырылыу, айырым кешегә беркетелмәү; **рабо́та обезли́чилась** эш яуап биреүсеһеҙ ҡалдырылды

**ОБЕЗЛИ́ЧКА** *ж* эйәһеҙлек, яуапһыҙлыҡ, шәхси яуаплылыҡ булмау; **обезли́чка в рабо́те** эшкә яуапһыҙлыҡ

**ОБЕЗЛЮ́ДЕТЬ** *сов.* кешеһеҙ ҡалыу; **дере́вня обезлю́дела** ауыл кешеһеҙ ҡалды

**ОБЕЗОБРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **обезобра́зить**

**ОБЕЗОБРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обезобра́зиться 2.** *страд. от* **обезобра́живать**

**ОБЕЗОБРА́ЗИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* йәмһеҙләндереү, күркен (йәмен) китәреү (ебәреү), ҡиәфәтен боҙоу; **обезобра́зить дом пристро́йками** төкәтмәләр менән өйҙөң күркен ебәреү **2.** *что* боҙоп (үҙгәртеп) күрһәтеү (*фекерҙе, әҙәби әҫәрҙе һ.б.*); **обезобра́зить мысль а́втора** авторҙың фекерен боҙоп күрһәтеү

**ОБЕЗОБРА́ЗИТЬСЯ** *сов.* йәмһеҙләнеү, ҡиәфәт боҙолоу, йәме (күрке) китеү

**ОБЕЗОПА́СИТЬ** *сов. кого-что* ҡурҡыныстан (хәүеф-хәтәрҙән) һаҡлау, хәүефһеҙлекте (именлекте) тәьмин итеү; **обезопа́сить полёты** осоштарҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү

**ОБЕЗОПА́СИТЬСЯ** *сов.* ҡурҡыныстан (хәүеф-хәтәрҙән) һаҡланыу, хәүефһеҙлеге (именлеге) тәьмин ителеү; **обезопа́ситься от нападе́ния** һөжүм ҡурҡынысынан һаҡланыу

**ОБЕЗОРУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **обезору́жить**

**ОБЕЗОРУ́ЖИТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡоралһыҙландырыу, ҡоралын алыу; **обезору́жить врага́** дошманды ҡоралһыҙландырыу **2.** *перен.* ҡаршы тора (ҡарышлаша) алмаҫлыҡ итеү, буйһондороу, тынысландырыу; **обезору́жить ла́ской** иркәләп тынысландырыу; **обезору́жить оппоне́нта** оппонентты ҡаршы тора алмаҫлыҡ итеү

**ОБЕЗУ́МЕТЬ** *сов.* аҡылдан яҙыу (шашыу); **обезу́меть от стра́ха** ҡурҡыуҙан аҡылдан яҙыу

**ОБЕЗЬЯ́НА** *ж* **1.** маймыл; **человекообра́зная обезья́на** кеше һымаҡ маймыл **2.** *разг.* (*кривляка*) маймыл, ҡылансыҡ, борғандаҡ, шиҡандаҡ

**ОБЕЗЬЯ́НИЙ,** -ья, -ье маймыл ...ы; **обезья́ний пито́мник** маймыл питомнигы

**ОБЕЗЬЯ́ННИК** *м* маймыл ситлеге (*зоопаркта, питомникта*)

**ОБЕЗЬЯ́ННИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* маймылланыу, ҡыланыу

**ОБЕЛИ́СК** *м* обелиск, һәйкәл; **грани́тный обели́ск** гранит һәйкәл

**ОБЕЛИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* аҡлау, ғәйепһеҙ тип табыу; **стара́ться обели́ть себя́** үҙеңде аҡларға тырышыу

**ОБЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аҡланыу, аҡланып сығыу; **ему́ удало́сь обели́ться** ул аҡланып сыға алды

**ОБЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **обели́ть**

**ОБЕРЕГА́ТЬ** *несов. кого-что* һаҡлау, һаҡлап алып ҡалыу, ҡурғаулау; **оберега́ть дете́й от просту́ды** балаларҙы һыуыҡ тейеүҙән һаҡлау; **оберега́ть иму́щество** милекте һаҡлау

**ОБЕРЕГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** һаҡланыу, һаҡланып ҡалыу; **оберега́ться от просту́ды** һыуыҡ үтеүҙән (тейеүҙән) һаҡланыу **2.** *страд. от* **оберега́ть**

**ОБЕРЕ́ЧЬ** *сов. см.* **оберега́ть**

**ОБЕРНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* урау, урап ҡуйыу; **оберну́ть ше́ю ша́рфом** муйынға шарф урау **2.** *что* төрөү, төрөп ҡуйыу; **оберну́ть кни́гу газе́той** китапты гәзиткә төрөп ҡуйыу **3.** *что* бороу, бороп ебәреү; **оберну́ть лицо́ к сосе́ду** йөҙҙө күршегә бороу; **оберну́ть де́ло в свою́ по́льзу** *перен.* эште үҙ файҙаңа бороп ебәреү **4.** *что* әйләндереү, әйләндереп һалыу (һалып ҡуйыу); **оберну́ть меда́ль друго́й стороно́й** миҙалды икенсе яғы менән әйләндереп һалыу **5.** *кого-что*; *фольк.* әйләндереү, әүерелдереү; **оберну́ть ма́льчика в пти́цу** малайҙы ҡошҡа әйләндереү

**ОБЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** боролоу, әйләнеү, боролоп (әйләнеп) ҡарау; **оберну́ться лицо́м к собесе́днику** әңгәмәсегә йөҙ менән боролоу; **он да́же не оберну́лся** ул боролоп та ҡараманы **2.** әйләнеп сығыу; **оберну́ться 100 раз** 100 тапҡыр әйләнеп сығыу **3.** *перен.* әйләнеү, (икенсе төрлө) бүтән төҫ (юл, йүнәлеш, боролош) алыу; **всё оберну́лось ина́че** бөтәһе лә икенсе төрлө йүнәлеш алды; **дела́ оберну́лись в на́шу по́льзу** эштәр беҙҙең файҙаға әйләнде **4.** *разг.* (*съездив, сходив, вернуться назад*) әйләнеп (боролоп) ҡайтыу; **ра́ньше ча́са не обернёшься** бер сәғәттә генә әйләнеп ҡайта алмаҫһың **5.** *разг.* (*выйти из затруднения*) етешеү, өлгөрөү, өлгәшеү; **ка́к-нибудь обернёмся** нисек булһа ла етешербеҙ әле; **с одни́м тра́ктором не оберну́ться** бер трактор менән генә өлгөрөп булмаҫ **6.** *кем-чем, в кого-что*; *фольк.* әйләнеү, әүерелеү; **оберну́ться лисо́й (в лису́)** төлкөгә әүерелеү **7.** *эк.* әйләнеш яһау; **капита́л оберну́лся за ме́сяц** капитал бер айҙа әйләнеш яһаны

**ОБЁРТКА** *ж* **1.** *см.* **оберну́ть** 2; **2.** тышлыҡ, тыш; **тетра́дь в си́ней обёртке** күк тышлы дәфтәр

**ОБЕРТО́Н** *м*; *муз.* обертон (*төп тауышҡа өҫтәмә төҫмөр бирә торған эйәрсән тауыш*)

**ОБЁРТОЧНЫЙ,** -ая, -ое (әйбер) төрөү ...ы; **обёрточная бума́га** әйбер төрөү ҡағыҙы; **обёрточная мате́рия** төрөү туҡымаһы

**ОБЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **оберну́ть**

**ОБЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оберну́ться** 1—3, 6; **2.** *страд. от* **обёртывать**

**ОБЕС...** *приставка см.* **обез...**

**ОБЕСКРО́ВИТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡанһыратыу, ҡанын ағыҙыу (ағыҙып бөтөрөү) **2.** *перен.* көсһөҙләндереү, хәлһеҙләндереү, ҡарыуын (кәрен) алыу; **обескро́вить врага́** дошманды көсһөҙләндереү

**ОБЕСКРО́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **обескро́вить**

**ОБЕСКУРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **обескура́жить**

**ОБЕСКУРА́ЖИТЬ** *сов. кого-что* аптыратыу, аптыраушта ҡалдырыу; **обескура́жить неожи́данным вопро́сом** көтөлмәгән һорау менән аптырашта ҡалдырыу

**ОБЕСПЕ́ЧЕНИЕ** *с* **1.** *см.* **обеспе́чить 2.** тәьминәт; **социа́льное обеспе́чение** социаль тәьминәт

**ОБЕСПЕ́ЧЕННОСТЬ** *ж* **1.** тәьмин ителеү, тәьмин ителгәнлек, тәьмин ителгән булыу; **обеспе́ченность заво́да то́пливом** заводтың яғыулыҡ менән тәьмин ителгәнлеге **2.** (*достаток*) мул, етеш, муллыҡ, етешлек; **материа́льная обеспе́ченность** матди етешлек, етеш (мул) тороу

**ОБЕСПЕ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обеспе́чить 2.** *прил.* етеш, мул; **обеспе́ченная жизнь** мул тормош; **обеспе́ченный челове́к** етеш кеше

**ОБЕСПЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **обеспе́чить**

**ОБЕСПЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обеспе́читься 2.** *страд. от* **обеспе́чивать**

**ОБЕСПЕ́ЧИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тәьмин итеү; **обеспе́чить свою́ семью́** ғаиләнде тәьмин итеү; **обеспе́чить хозя́йство семена́ми** хужалыҡты орлоҡ менән тәьмин итеү **2.** *что* булдырыу, тәьмин итеү; **обеспе́чить побе́ду** еңеүҙе булдырыу; **обеспе́чить подъём эконо́мики** иҡтисад үҫешен тәьмин итеү; **обеспе́чить права́ гра́ждан** граждандарҙың хоҡуҡтарын тәьмин итеү

**ОБЕСПЕ́ЧИТЬСЯ** *сов. чем*; *разг.* тәьмин ителеү, әҙерләп ҡуйыу; **обеспе́читься проду́ктами** аҙыҡ менән тәьмин ителеү; **обеспе́читься необходи́мым** бөтә кәрәк-яраҡтарҙы әҙерләп ҡуйыу

**ОБЕСПОКО́ИТЬ** *сов. кого* тынысһыҙлау, борсоу, маҙаһыҙлау; **обеспоко́ить прихо́дом** килеп тынысһыҙлау; **обеспоко́ить про́сьбой** үтенес менән борсоу

**ОБЕСПОКО́ИТЬСЯ** *сов. чем* тынысһыҙланыу, борсолоу, хафаланыу; **обеспоко́иться опозда́нием госте́й** ҡунаҡтарҙың һуңлауына борсолоу; **чем он обеспоко́ился?** нимәгә ул хафаланды?

**ОБЕССИ́ЛЕТЬ** *сов.* хәлһеҙләнеү, кәрһеҙләнеү, көсһөҙләнеү, хәл (көс, кәр) бөтөү, хәлдән тайыу (яҙыу), киңгәү, йонсоу, әлһерәү; **обесси́леть от тяжёлой рабо́ты** ауыр эштән йонсоу; **обисси́леть от уста́лости** киңгәп китеү (*көс, хәл бөтөү*)

**ОБЕССИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **обесси́лить**

**ОБЕССИ́ЛИТЬ** *сов. кого-что* хәлһеҙләндереү, көсһөҙләндереү, көсөн (хәлен) бөтөрөү, мәлйерәтеү, йонсотоу; **бессо́нная ночь обесси́лила его́** йоҡоһоҙ төн уны йонсотто

**ОБЕССЛА́ВИТЬ** *сов. кого-что* яманатын һатыу (сығарыу), хурлыҡҡа төшөрөү, абруйын төшөрөү; **не обессла́вить свой род** нәҫелеңдең яманатын сығармау; **обессла́вить свою́ репута́цию** абруйыңды төшөрөү

**ОБЕССЛА́ВИТЬСЯ** *сов.* яманатҡа ҡалыу, яманат сығыу, хурлыҡҡа төшөү

**ОБЕССЛА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **обессла́вить**

**ОБЕССМЕ́РТИТЬ** *сов. кого-что* мәңгеләштереү, мәңгелек (үлмәҫлек) итеү; **обессме́ртить своё и́мя** исемеңде мәңгеләштереү

**ОБЕССУ́ДИТЬ: не обессу́дь(те)** ғәйепләмә(геҙ), ғәйепкә алма(ғыҙ), ғәйеп итмә(геҙ)

**ОБЕСЦВЕ́ТИТЬ** *сов.* **1.** *что* төҫһөҙләндереү, уңдырыу; **обесцве́тить ткань** туҡыманы төҫһөҙләндереү **2.** *кого-что*; *перен.* (*сделать невыразительным*) ярлыландырыу, төҫһөҙләндереү, үҙенсәлектәрен бөтөрөү; **обесцве́тить о́браз** образды ярлыландырыу

**ОБЕСЦВЕ́ТИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать менее ярким*) төҫһөҙләнеү, уңыу, төҫө китеү; **ткань обесцве́тилась от со́лнца** туҡыма ҡояшҡа уңған **2.** *перен.* (*стать невыразительным*) төҫһөҙләнеү, үҙенсәлектәре бөтөү (юғалыу)

**ОБЕСЦВЕ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **обесцве́тить**

**ОБЕСЦВЕ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обесцве́титься 2.** *страд. от* **обесцве́чивать**

**ОБЕСЦВЕ́ЧИВАЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **обесцве́чивать 2.** *прил.* төҫһөҙләндереүсе, төҫһөҙләндерә (уңдыра) торған; **обесцве́чивающее вещество́** уңдыра торған матдә

**ОБЕСЦЕ́НЕНИЕ** *с см.* **обесце́нить, обесце́ниваться**

**ОБЕСЦЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **обесце́нить**

**ОБЕСЦЕ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обесце́ниться 2.** *страд. от* **обесце́нивать**

**ОБЕСЦЕ́НИТЬ** *сов. что* **1.** хаҡын (ҡиммәтен, баһаһын) төшөрөү, осһоҙландырыу, арзанайтыу; **обесце́нить вещь** әйберҙең хаҡын төшөрөү **2.** *перен.* (*лишить значимости*) ҡәҙерһеҙләндереү, ҡәҙерен ебәреү (бөтөрөү, китәреү); **обесце́нить речь пусты́ми слова́ми** күп һөйләп, һүҙҙең ҡәҙерен бөтөрөү

**ОБЕСЦЕ́НИТЬСЯ** *сов.* **1.** хаҡы төшөү, ҡиммәте бөтөү, арзанайыу, осһоҙланыу; **де́ньги обесце́нились** аҡсаның ҡиммәте бөттө **2.** *перен.* (*утратить значимость*) ҡәҙерһеҙләнеү, ҡәҙере китеү

**ОБЕСЧЕ́СТИТЬ** *сов. кого-что* хур итеү, хурлыҡҡа төшөрөү, йөҙгә ҡара яғыу

**ОБЕ́Т** *м* **1.** нәҙер; **дать обе́т** нәҙер әйтеү; **мона́шеский обе́т** монах нәҙере **2.** *высок.* (*обещание*) вәғәҙә, ант, һүҙ; **испо́лнить обе́т** антты үтәү

**ОБЕТОВА́ННЫЙ: обетова́нная земля́ (страна́); обетова́нный край** *книжн.* барырға ашҡынып торған (бай) ер

**ОБЕЩА́НИЕ** *с* вәғәҙә, һүҙ; **испо́лнить обеща́ние** һүҙендә тороу; **дать обеща́ние** вәғәҙә биреү; **взять обеща́ние** *с кого-л. берәй кемдән* һүҙ алыу; **дать кля́твенное обеща́ние** тантаналы рәүештә вәғәҙә биреү

**ОБЕЩА́ТЬ 1.** *сов., несов. что, с неопр.* и *с союзом "что"* вәғәҙә итеү (биреү), һүҙ биреү; **обеща́л прийти́ во́время** ваҡытында килеп етергә вәғәҙә итте; **обеща́л, что придёт** килергә һүҙ бирҙе **2.** *несов.* -ға/-гә өмөтләндереү, өмөт биреү, оҡшау; **день обеща́ет быть жа́рким** көн эҫе булырға оҡшай

**ОБЖА́ЛОВАНИЕ** *с см.* **обжа́ловать**

**ОБЖА́ЛОВАТЬ** *сов. что* ялыу биреү; **обжа́ловать суде́бный пригово́р** суд ҡарарына ялыу биреү

**ОБЖА́РИВАТЬ** *несов. см.* **обжа́рить**

**ОБЖА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обжа́риться 2.** *страд. от* **обжа́ривать**

**ОБЖА́РИТЬ** *сов. что* ҡыҙҙырыу, ҡурыу; **обжа́рить мя́со** ит ҡыҙҙырыу; **обжа́рить карто́фель** картуф ҡурыу

**ОБЖА́РИТЬСЯ** *сов.* ҡыҙҙырылыу, ҡурылыу; **ры́ба хорошо́ обжа́рилась** балыҡ һәйбәт ҡыҙҙырылған

**ОБЖА́ТЬ I** *сов. что* һығыу, ҡыҫыу; **обжа́ть мо́крую оде́жду** еүеш кейемде һығыу

**ОБЖА́ТЬ II** *сов. что* (*сжать злаки и т.п.*) урып алыу (бөтөрөү); **обжа́ть овёс** һолоно урып алыу

**ОБЖЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** яндырыу, өтөү, яндырып (өтөп) алыу, көйҙөрөү; **обже́чь коне́ц па́лки** таяҡ осон яндырыу **2.** бешереү, яндырыу, бешереп (яндырып, өтөп) алыу; **обже́чь себе́ па́лец** бармаҡты яндырыу **3.** яндырыу, өтөү, яндырып (өтөп) алыу; (*о крапиве*) сағыу, семетеү; **крапи́ва обожгла́ мне но́ги** кесерткән аяҡтарымды саҡты; **ве́тер обжёг ему́ лицо́** ел унын битен семетте (өтөп алды); **обже́чь ру́ки кислото́й** ҡулды кислотаға яндырыу **4.** (*подвергнуть действию огня при обработке чего-л.*) үртәү, яндырыу; **обже́чь кирпи́ч** кирбес үртәү

**ОБЖЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** *чем* бешеү, яныу, бешеп алыу, янып ҡуйыу; **обже́чься горя́чим ча́ем** ҡайнар сәйгә бешеү; **обже́чься кислото́й** кислотаға яныу **2.** *на чём* и *без доп.*; *перен., разг.* яныу, (ныҡ) отолоу, ауыҙ бешеү; **обже́чься на сомни́тельной зате́е** ышанысһыҙ эштә отолоу; **он рискну́л, да обжёгся** ул тәүәккәлләгәйне лә, тик ауыҙы беште

**ОБЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **обжи́ть**

**ОБЖИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обжи́ться 2.** *страд. от* **обжива́ть**

**О́БЖИГ** *м*; *спец. см.* **обже́чь** 4 — **обжига́ть**; **о́бжиг керами́ческих изде́лий** балсыҡтан яһалған һауыт-һабаларҙы үртәү

**ОБЖИГА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* үртәү ...ы, яндырыу ...ы; **обжига́тельный цех** үртәү цехы

**ОБЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **обже́чь**

**ОБЖИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обже́чься 2.** *страд. от* **обжига́ть**

**ОБЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **обжа́ть** I

**ОБЖИ́МКА** *ж см.* **обжима́ть**

**ОБЖИ́МКИ** *только мн.* һығынты

**ОБЖИНА́ТЬ** *несов. см.* **обжа́ть** II

**ОБЖИТО́Й,** -ая, -ое **1.** кеше торған (урынлашҡан, йәшәгән); **обжиты́е места́** кеше урынлашҡан ерҙәр **2.** торорға (йәшәргә) яраҡлаштырылған, кеше торған; **обжита́я кварти́ра** торорға яраҡлаштырылған фатир

**ОБЖИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* торорлоҡ хәлгә килтереү, торорға (йәшәргә) яйлаштырыу; **обжи́ть пусты́нные места́** буш урындарҙы торорлоҡ хәлгә килтереү; **обжи́ть ко́мнату** бүлмәне тороу өсөн яйлаштырыу

**ОБЖИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* эйәләшеү, йәшәп (тороп, күнегеп, өйрәнеп) китеү; **обжи́ться в дере́вне** ауылға эйәләшеү; **обжи́ться на но́вом ме́сте** яңы ерҙә күнегеп китеү

**ОБЖО́РА** *м* и *ж*; *разг.* мәскәй, убыр, аскернә, бирән, ғуж

**ОБЖО́РСТВО** *с*; *разг.* мәскәйлек, убырлыҡ, аскернәлек, бирәнлек, ҡомағайлыҡ

**ОБЗАВЕДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обзавести́сь 2.** *разг.* (*вещи, инвентарь*) йыһаз, йорт кәрәк-ярағы; **всё обзаведе́ние** бөтә йорт кәрәк-ярағы

**ОБЗАВЕСТИ́СЬ** *сов. кем-чем*; *разг.* **1.** алыу, булдырыу; **обзавести́сь ме́белью** мебель алыу; **обзавести́сь хозя́йством** хужалыҡ булдырыу **2.** (*завести, создать*) ҡороу, -лы/-ле булыу (булып алыу), булдырыу; **обзавести́сь знако́мствами** таныш-белешле булыу

**ОБЗАВОДИ́ТЬСЯ** *несов. см.* **обзавести́сь**

**ОБЗВА́НИВАТЬ** *несов. см.* **обзвони́ть**

**ОБЗВОНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* шылтыратып сығыу (*телефондан*); **обзвони́ть знако́мых** таныштарға шылтыратып сығыу

**ОБЗО́Р** *м* **1.** *см.* **обозре́ть** — **обозрева́ть 2.** *спец.* күреү (күҙәтеү) мөмкинлеге; **кругово́й обзо́р** тирә-яҡты күҙәтеү мөмкинлеге **3.** (*сжатое сообщение*) күҙәтеү; **междунаро́дный обзо́р** халыҡ-ара күҙәтеү

**ОБЗО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *спец.* һәйбәт күҙәтелә торған; **обзо́рная пози́ция** һәйбәт күҙәтелә торған урын **2.** күҙәтеү ...ы, күҙәтеп сығыу ...ы; **обзо́рная ле́кция** күҙәтеү лекцияһы

**ОБЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **обозва́ть**

**ОБИВА́ТЬ** *несов. см.* **оби́ть**

**ОБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оби́ться 2.** *страд. от* **обива́ть**

**ОБИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **оби́ть 2.** (*материал*) тышлыҡ, тыш; **оби́вка дива́на** диван тышлығы

**ОБИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое тышлыҡ, көплөк, тышлыҡ ...ы, көплөк ...ы; **оби́вочная ткань** тышлыҡ туҡыма

**ОБИ́ДА** *ж* **1.** үпкә, үпкәләү, хәтер ҡалыу (ҡалдырыу), күңел ҡырылыу, рәнйеү; **слова́ оби́ды** үпкә һүҙҙәре; **ме́лкие оби́ды** ваҡ-төйәккә хәтер ҡалыу; **кро́вная оби́да** ҡаты үпкә, ныҡ хәтер ҡалыу; **не в оби́ду будь ска́зано** хәтерең (хәтерегеҙ) ҡалмаһын; **нанести́ оби́ду** үпкәләтеү, хәтер ҡалдырыу; **терпе́ть оби́ду** үпкәләү; **не забыва́ть оби́ду** үпкә һаҡлау **2.** *в знач. сказ.*, *разг.* (*с мест. "какой", "такой" и т.п.*) үкенес, аяныс; **опозда́л, така́я оби́да!** һуңланым, шундай үкенес! ♦ **быть в оби́де** *на кого* үпкә тотоу, үпкәләү; **не дать в оби́ду** *кого* яҡлау, башҡаларға рәнйетергә ирек бирмәү; **не да́ться в оби́ду** *кому* үҙеңде рәнйетергә ирек бирмәү

**ОБИ́ДЕТЬ** *сов. кого* **1.** үпкәләтеү, ҡыйырһытыу, рәнйетеү, хәтер ҡалдырыу; **несправедли́во оби́деть** нахаҡҡа рәнйетеү; **оби́деть неосторо́жным сло́вом** уйламай әйтеп үпкәләтеү **2.** *чем*; *разг.* үгәйһетеү, ситләтеү, ситнәтеү, кәмһетеү, йәберләү, мәхрүм итеү; **приро́да не оби́дела его́ здоро́вьем** тәбиғәт уны һаулыҡтан мәхрүм итмәгән

**ОБИ́ДЕТЬСЯ** *сов. на кого-что* үпкәләү, рәнйеү, ҡылтайыу, хәтер ҡалыу; **оби́деться на замеча́ние** шелтәгә үпкәләү

**ОБИ́ДНО 1.** *нареч.* үпкәләтерлек (рәнйетерлек, хәтер ҡалдырырлыҡ) итеп, үкенесле; **оби́дно разбрани́ть** үпкәләтерлек итеп әрләү **2.** *кому в знач. сказ.*, *безл.* үкенес, үкенесле, аяныс; **оби́дно ви́деть э́то** быны күреү аяныс; **оби́дно, что не успе́л зако́нчить** үкенесле, бөтөрә алманым

**ОБИ́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** үпкәләтерлек, рәнйетерлек, хәтер ҡалдырырлыҡ; **оби́дное замеча́ние** үпкәләтерлек шелтә **2.** *разг.* (*досадный*) үкенесле, аяныслы; **оби́дная оши́бка** үкенесле хата; **оби́дный недосмо́тр** аяныслы иғтибарһыҙлыҡ ♦ **до оби́дного** бик, бигерәк, ифрат; **до оби́дного ма́ло вре́мени** ваҡыт бигерәк аҙ

**ОБИ́ДЧИВОСТЬ** *ж* үпкәселлек, хәтер ҡалыусанлыҡ, ғәрселлек, ғәрләнеүсәнлек; **боле́зненная оби́дчивость** саманан тыш үпкәселлек

**ОБИ́ДЧИВЫЙ,** -ая, -ое хәтере ҡалыусан, ҡылтым(бый), үпкәсел, үпкәләүсән, ғәрсел, ғәрләнеүсән; **оби́дчивый челове́к** үпкәсел кеше

**ОБИ́ДЧИК** *м* и **ОБИ́ДЧИЦА** *ж* ҡыйырһытыусы, хәтер ҡалдырыусы, үпкәләтеүсе, рәнйетеүсе

**ОБИЖА́ТЬ** *несов. см.* **оби́деть**

**ОБИЖА́ТЬСЯ** *несов. см.* **оби́деться**

**ОБИ́ЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **оби́деть** **2.** *прил.* үпкәле, рәнйеүле, йәберле, үпкәләгән, рәнйегән; **оби́женный вид** үпкәле ҡиәфәт; **оби́женный взгляд** рәнйеүле ҡараш; **он оби́жен на прия́теля** ул дуҫына үпкәләгән

**ОБИ́ЛИЕ** *с* **1.** күплек; **оби́лие ры́бы** балыҡтың күплеге **2.** (*достаток*) муллыҡ, бәрәкәт

**ОБИ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мул, (бик) күп; **оби́льный урожа́й** мул уңыш; **оби́льные снега́** бик күп ҡар, ҡарҙың күплеге **2.** (*богатый*) бай, мул, етеш; **оби́льный ху́тор** бай утар

**ОБИНУ́ЯСЬ: не обину́ясь** *уст.* икеләнмәй, уйлап тормай, шикләнмәйенсә; **не обину́ясь вы́сказать своё мне́ние** фекереңде икеләнмәйенсә әйтеү

**ОБИНЯ́К** *м*; *уст.* ситләтеп әйтелгән һүҙ, кинәйә, әйтеп еткермәгәнлек, төрттөрөү; **в ка́ждом вопро́се како́й-нибудь обиня́к** һәр бер һорауҙа кинәйә ♦ **обиняко́м (обиняка́ми) говори́ть (спра́шивать и т.п.)** ситләтеп һөйләү (һорау һ.б.); **без обиняко́в говори́ть (спра́шивать и т.п.)** туранан-тура әйтеү

**ОБИРА́ТЬ** *несов. см.* **обобра́ть**

**ОБИТА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обита́ть** **2.** *прил.* кеше йәшәгән (торған); **обита́емый о́стров** кеше йәшәгән утрау

**ОБИТА́ЛИЩЕ** *с*; *уст.* төйәк; **люби́мое обита́лище** яратҡан төйәк

**ОБИТА́НИЕ** *с см.* **обита́ть**; **место́ обита́ния живо́тных** хайуандар йәшәгән урын; **среда́ обита́ния** йәшәү мөхите

**ОБИТА́ТЕЛЬ** *м* тороусы, йәшәүсе, төйәкләнеүсе, көн итеүсе; **обита́тели дере́вни** ауылда тороусылар

**ОБИТА́ТЬ** *несов.* тороу, йәшәү, көн күреү (итеү); **обита́ть на Ура́ле** Уралда йәшәү

**ОБИ́ТЕЛЬ** *ж* **1.** *книжн.*, *уст.* монастырь **2.** *чья*, *какая*; *шутл.* торған (йәшәгән) урыны

**ОБИ́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡағып (бәреп, һелкетеп, китеп) төшөрөү, ҡуптарып төшөрөү; **оби́ть штукату́рку** штукатурканы ҡуптарып төшөрөү; **оби́ть снег** ҡарҙы ҡағып төшөрөү; **оби́ть я́блоню** алмаларҙы һелкетеп төшөрөү **2.** *разг.* туҙҙырыу; **оби́ть края́ брюк** салбар балағы остарын туҙҙырыу **3.** *чем* көпләү, тышлау; **оби́ть сту́лья ко́жей** ултырғыстарҙы күн менән тышлау ♦ **оби́ть (все) поро́ги** тупһа тапау (*берәй эш артынан йөрөп, йөҙәп бөтөү*)

**ОБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*отвалиться*) ҡойолоп (ҡубып, кителеп) төшөү; **штукату́рка оби́лась** штукатурка ҡойолоп төшкән **2.** ҡырылыу, туҙыу; **подо́л шу́бы оби́лся** тундың итәк осо ҡырылған

**ОБИХО́Д** *м* **1.** көндәлек тормош, ғәҙәт, йәй; **повседне́вный обихо́д** көндәлек тормош; **жизнь идёт свои́м обихо́дом** тормош үҙ яйы менән бара **2.** ҡулланылыу, файҙаланылыу, ҡулланылыш; **войти́ в обихо́д** ҡулланылышҡа инеү; **вы́йти из обихо́да** файҙаланыуҙан сығыу

**ОБИХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое ғәҙәткә кереп киткән, көндәлек, көндәге, ғәҙәттәге, көн дә ҡулланылған; **обихо́дные предме́ты** көн дә ҡулланылған әйберҙәр; **обихо́дное сло́во** ғәҙәттәге һүҙ

**ОБКА́ЛЫВАТЬ I** *несов. см.* **обколо́ть** I

**ОБКА́ЛЫВАТЬ II** *несов. см.* **обколо́ть** II

**ОБКА́ПАТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тамыҙып бысратыу, тамыҙып бөтөрөү; **обка́пать ска́терть варе́ньем** ашъяулыҡҡа ҡайнатма тамыҙып бысратыу

**ОБКА́ПЫВАТЬ I** *несов. см.* **обка́пать**

**ОБКА́ПЫВАТЬ II** *несов. см.* **обкопа́ть**

**ОБКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **обкорми́ть**

**ОБКАТА́ТЬ** *сов. что* **1.** шымартыу, шымартып бөтөрөү; **мо́рем обка́танные ка́мни** диңгеҙ шымартып бөтөргән таштар **2.** *разг.* әйләндереп (тәгәрәтеп) йомарлау, әүәләү; **обката́ть котле́ту в муке́** котлетты онда әүәләү **3.** тигеҙләү, тигеҙ итеү, йөрөп (йөрөтөп, шыуып һ.б.) шымартыу, тапау, таҡырайтыу **4.** *спец.* йөрөтөп һынау; **обката́ть автомоби́ль** автомобилде йөрөтөп һынау

**ОБКА́ТКА** *ж см.* **обката́ть**

**ОБКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **обката́ть**

**ОБКА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **обкоси́ть**

**ОБКЛА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **обкла́дывать – обложи́ть** 1, 2, 4; **2.** түшәмә; **обкла́дка конденса́тора** конденсатор түшәмәһе

**ОБКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **обложи́ть**

**ОБКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **обкле́ить**

**ОБКЛЕ́ИТЬ** *сов. см.* **окле́ить**

**ОБКОЛО́ТЬ I** *сов. что* ватып (сабып, китеп) төшөрөү, ватып сығыу; **обколо́ть лёд с крыльца́** тупһанан боҙҙо сабып төшөрөү

**ОБКОЛО́ТЬ II** *сов.*; *разг.* **1.** *что* сәнсеп сығыу (*осло әйбер менән*) **2.** *кого-что* сәнсеп яралау; **обколо́ть па́лец иго́лкой** бармаҡты сәнсеп яралау

**ОБКО́М** *м* (*областной комитет*) өлкә комитеты; **обко́м па́ртии** партия өлкә комитеты

**ОБКОПА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **окопа́ть** 1

**ОБКОРМИ́ТЬ** *сов. кого-что* кәрәгенән тыш (артыҡ күп) ашатыу; **обкорми́ть ребёнка** баланы артыҡ күп ашатыу

**ОБКОРНА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* **1.** бик ҡыҫҡа итеп киҫеү (ҡырҡыу), ҡыҫҡа киҫеп боҙоу, тигеҙ ҡырҡмай эштән сығарыу (боҙоу) (*кейемде, сәсте һ.б.*); **обкорна́ть пла́тье** күлдәкте ҡыҫҡа киҫеп боҙоу; **обкорна́ть куст но́жницами** ҡыуаҡты ҡайсы менән ҡыҫҡа итеп ҡырҡҡыслау **2.** *перен.* ҡыҫҡартып боҙоу (үҙгәртеү); **обкорна́ть по́весть** повесты ҡыҫҡартып боҙоу

**ОБКОСИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тирәләй (тирә-яғын) сабып сығыу; **обкоси́ть ко́чку** түңгәктең тирә-яғын сабып сығыу **2.** *что* сабып бөтөү (сығыу); **обкоси́ть луг** туғайҙы сабып бөтөү **3.** *кого*; *разг.* сабыуҙа уҙыу **4.** *что* сабып (яйлап алыу) яйлау (*салғыны*); **обкоси́ть косу́** салғыны сабып яйлау

**ОБКРА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **обокра́сть**

**ОБКРОШИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ваҡлау, ыуалау; **обкроши́ть хлеб** икмәкте ваҡлау

**ОБКРОШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ваҡланыу, кителеү; **зуб обкроши́лся** теш кителде

**ОБКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **обкури́ть**

**ОБКУРИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *см.* **окури́ть 2.** *кого-что* тәмәке төтөнөнә ыҫлап (һарғайтып, ҡарайтып) бөтөрөү; **обкури́ть сте́ны** стеналарҙы тәмәке төтөнөнә ыҫлап бөтөрөү **3.** *что* тарта-тарта яйлау (яйлаштырыу); **обкури́ть тру́бку** төрөпкәне тарта-тарта яйлау

**ОБКУСА́ТЬ** *сов. что* (тирәләй) кимереп (тешләп) бөтөрөү; **обкуса́ть я́блоко** алманы кимереп бөтөрөү

**ОБКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **обкуса́ть**

**ОБЛА́ВА** *ж* **1.** ҡамау, аулау, ҡамап алыу, ҡамап аулау; **обла́ва на волко́в** бүреләрҙе ҡамап аулау; **медве́жья обла́ва** айыу аулау **2.** (*оцепление места с целью поимки кого-л.*) ҡамалыш, ҡамау, ҡамап алыу; **попасть в обла́ву** ҡамалышҡа эләгеү

**ОБЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **обложи́ть**

**ОБЛАГОДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *сов. кого*; *уст.*, *ирон.* яҡшылыҡ ҡылыу (эшләү)

**ОБЛАГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **облагоро́дить**

**ОБЛАГОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **облагоро́диться 2.** *страд. от* **облагора́живать**

**ОБЛАГОРО́ДИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* матурлау, юғары күтәреү, затын күтәреү; **облагоро́дить челове́ка** кешене юғары күтәреү **2.** *что*; *спец.* сифатын (тоҡомон) яҡшыртыу; **облагоро́дить расте́ние приви́вкой** үҫемлекте ашлап, сифатын яҡшыртыу; **облагоро́дить древеси́ну** үҙағастың сифатын яҡшыртыу

**ОБЛАГОРО́ДИТЬСЯ** *сов.* **1.** (әхлаҡи яҡтан) яҡшырыу, матурланыу, юғары күтәрелеү, заты күтәрелеү, рухи яҡтан үҫеү **2.** *спец.* (*о растениях*, *животных*, *материалах*) сифаты (тоҡомо, нәҫеле) яҡшырыу

**ОБЛАДА́НИЕ** *с см.* **облада́ть**

**ОБЛАДА́ТЕЛЬ** *м* и **ОБЛАДА́ТЕЛЬНИЦА** *ж* эйә, хужа, биләүсе, ҡулда тотоусы; **облада́тель ку́бка** кубоктың эйәһе

**ОБЛАДА́ТЬ** *несов. кем-чем* биләү, эйә (хужа) булыу, -лы/-ле булыу, ҡулда тотоу; **облада́ть исто́чниками сырья́** сеймал сығанаҡтарына эйә булыу; **облада́ть хоро́шим вку́сом** яҡшы зауыҡлы булыу

**ОБЛА́ЗИТЬ** *сов. что*; *разг.* (бөтә ерҙе) йөрөп сығыу, (бөтә урында) булып өлгөрөү; **обла́зить все тропи́нки** бөтә һуҡмаҡтарҙы йөрөп сығыу; **обла́зить весь го́род** ҡаланың бөтә урындарында ла булып сығыу

**О́БЛАКО** *с* болот; **пе́ристые облака́** ҡыйғас болоттар; **кучевы́е облака́** өйкөм болоттар ♦ **под облака́**; **под облака́ми**; **до облако́в** бик бейектә; **быть (вита́ть) в облака́х** хыял диңгеҙендә йөҙөү; **с облако́в свали́ться (упа́сть)** күктән төшкәндәй булыу, көтмәгәндә килеп сығыу

**ОБЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **облома́ть**, **обломи́ть**

**ОБЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **облома́ться, обломи́ться 2.** *страд. от* **обла́мывать**

**ОБЛА́ПИТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* (*обхватить лапами*) ҡосаҡлау, ҡосаҡлап алыу **2.** *прост.* (*грубо обнять*) (тупаҫ итеп) ҡосаҡлау

**ОБЛАСКА́ТЬ** *сов. кого* күңелен күреү (табыу), яҡты сырай күрһәтеү; **обласка́ть ро́дственника** туғандың күңелен күреү

**ОБЛАСТНО́Й,** -ая, -ое **1.** өлкә ...ы; **областно́й центр** өлкә үҙәге **2.** ерле, урындағы; **областно́е произноше́ние** ерле әйтелеш; **областно́е сло́во** урындағы һүҙ

**О́БЛАСТЬ** *ж* **1.** *в разн. знач.* өлкә; **Моско́вская о́бласть** Мәскәү өлкәһе; **автоно́мная о́бласть** автономиялы өлкә; **о́бласть ве́чной мерзлоты́** мәңге боҙлоҡ (һыуыҡ) өлкәһе; **теплово́дная о́бласть океа́на** океандың йылы һыуҙар өлкәһе (урыны); **но́вая о́бласть зна́ний** белемдең яңы өлкәһе; **рабо́тать в о́бласти медици́ны** медицина өлкәһендә эшләү **2.** *мед.* (*часть организма*) тәңгәл, тапҡыр, тирә; **о́бласть пе́чени** бауыр тәңгәле; **грудна́я о́бласть** түш тирәһе ♦ **отойти́ в о́бласть преда́ния (воспомина́ний)** онотолоп бөтөү, ҡулланылыуҙан сығыу, юғалыу

**ОБЛА́ТКА** *ж* облатка, капсула (*эсенә онтаҡлы дарыу һалыу өсөн крахмал йәки желатиндан яһалған тыш*); **хини́н в обла́тках** облаткалы хинин

**ОБЛАЧА́ТЬ** *несов. см.* **облачи́ть**

**ОБЛАЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **облачи́ться 2.** *страд. от* **облача́ть**

**ОБЛАЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **облачи́ть — облача́ть, облачи́ться 2.** (*одежда священнослужителя*) руханиҙар кейеме

**ОБЛАЧИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *книжн., уст.* **1.** кейҙереү, кейендереү; **облачи́ть ма́льчика в шине́ль** малайға шинель кейҙереү **2.** *церк.* (*одеть священнослужителя*) руханиға ғибәҙәт кейемен кейҙереү

**ОБЛАЧИ́ТЬСЯ** *сов. во что*; *книжн., уст.* **1.** (кейем) кейеү, кейенеү; **облачи́ться в мунди́р** мундир кейеү **2.** *церк.* ғибәҙәт кейемен кейеү

**О́БЛАЧНОСТЬ** *ж* болотло, болотло булыу, болоттар; **переме́нная о́блачность** аяҙлы-болотло

**О́БЛАЧНЫЙ,** -ая, -ое болотло, болот ҡаплаған; **о́блачная пого́да** болотло көн; **о́блачное не́бо** болот ҡаплаған күк

**ОБЛА́ЯТЬ** *сов. кого-что* **1.** абалау, абалап алыу, өрөп ташланыу; **соба́ка обла́яла незнако́мца** эт ят кешене абалап алды **2.** *охот.* -ғын/-ген өрөп белгертеү; **обла́ять бе́лку** тейен барлығын өрөп белгертеү **3.** *прост.* екереү, өрөү, һүгеү; **обла́ять челове́ка без причи́ны** бер сәбәпһеҙ кешегә екереү

**ОБЛЕГА́ТЬ** *несов. см.* **обле́чь** II

**ОБЛЕГЧА́ТЬ** *несов. см.* **облегчи́ть**

**ОБЛЕГЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **облегчи́ться 2.** *страд. от* **облегча́ть**

**ОБЛЕГЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **облегчи́ть — облегча́ть, облегчи́ться**; **облегче́ние усло́вий труда́** хеҙмәт шарттарын еңеләйтеү **2.** (*состояние лёгкости*) еңеллек; **почу́вствовать облегче́ние** еңеллек һиҙеү

**ОБЛЕГЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **облегчи́ть 2.** *прил.* еңеләйгән; **уйти́ с облегчённым се́рдцем** тыныс, тыныс күңел менән китеү

**ОБЛЕГЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** *в разн. знач.* ябайлаштырыу, еңеләйтеү, бушатыу; **облегчи́ть но́шу** йөктө еңеләйтеү; **облегчи́ть констру́кцию самолёта** самолёт конструкцияһын ябайлаштырыу; **облегчи́ть усло́вия труда́** эш шарттарын еңеләйтеү; **облегчи́ть судьбу́** *кого-л. берәй кешенең* яҙмышын еңеләйтеү **2.** *кого-что*; *перен.* баҫыу, тынысландырыу, еңеләйтеү; **облегчи́ть ду́шу** күңелде тынысландырыу; **облегчи́ть боль** ауыртыуҙы баҫыу

**ОБЛЕГЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* еңеләйеү, бушау, баҫылыу; **постро́йка облегчи́лась** төҙөлөш еңеләйҙе; **рабо́та облегчи́лась** эш еңеләйҙе

**ОБЛЕДЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое боҙло, боҙланған, боҙ ҡаплаған; **обледене́лое окно́** боҙланған тәҙрә

**ОБЛЕДЕНЕ́НИЕ** *с см.* **обледене́ть**

**ОБЛЕДЕНЕ́ТЬ** *сов.* боҙланыу, боҙ менән ҡапланыу; **ве́тви обледене́ли** ботаҡтар боҙ менән ҡапланған

**ОБЛЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **обле́зть**

**ОБЛЕ́ЗЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** йөнө (сәсе) ҡойолған, түләгән, өтәләнгән; **обле́злый котёнок** йөнө ҡойолған бесәй балаһы; **обле́злая ку́рица** түләгән тауыҡ **2.** (*полинявший*) төҫө бөткән, ҡубып бөткән (төшкән); **обле́злый забо́р** буяуы ҡубып төшкән ҡойма

**ОБЛЕ́ЗТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** (*о волосах, шерсти*) ҡойолоу, ҡойолоп бөтөү, йолоу, өтәләү, йолоп төшөү; (*о перьях*) түләү; **соба́ка обле́зла** эттең йөнө ҡойолған; **овчи́на обле́зла** һарыҡ тиреһенең йөнө йолоп төшкән **2.** (*о краске и т.п.*) ҡубып бөтөү (төшөү); **со стола́ обле́зла кра́ска** өҫтәлдең буяуы ҡубып төшкән

**ОБЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **обле́чь** I

**ОБЛЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обле́чься 2.** *страд. от* **облека́ть**

**ОБЛЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* ялҡауланыу, ялҡаулыҡҡа һалышыу; **облени́ться и ничего́ не де́лать** ялҡаулыҡҡа һалышып, бер нәмә лә эшләмәү

**ОБЛЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что* йәбешеү, һылашыу; **грязь облепи́ла сапоги́** итеккә батҡаҡ йәбешкән; **руба́шка облепи́ла спи́ну** күлдәк арҡаға һылашҡан **2.** *чем* йәбештереп бөтөү (сығыу), һырытыу; **облепи́ть сте́ны плака́тами** стенаға плакат йәбештереп бөтөү; **облепи́ть репе́йником** дегәнәк һырытыу **3.** *перен., разг.* һырып (уратып) алыу; **де́ти облепи́ли учи́тельницу** балалар уҡытыусыны һырып алған

**ОБЛЕПИ́ХА** *ж* һырғанаҡ, һарығат; **за́росли облепи́хи** һырғанаҡ ҡыуаҡтары; **варе́нье из облепи́хи** һырғанаҡ ҡайнатмаһы

**ОБЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **облепи́ть**

**ОБЛЕСИ́ТЬ** *сов. что*; *лес.* урман (ағас) ултыртыу, урман ултыртып сығыу; **облеси́ть сте́пи** далаға ағас ултыртыу

**ОБЛЕТА́ТЬ I** *сов. что* **1.** осоп әйләнеү, осоп әйләнеп сығыу; **облета́ть всю страну́** бөтә илде осоп әйләнеү **2.** *сов.* осоп һынау, осоп һынап ҡарау; **облета́ть самолёт** самолётты осоп һынап ҡарау

**ОБЛЕТА́ТЬ II** *несов. см.* **облете́ть**

**ОБЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, вокруг кого-чего* тирәләй осоу, осоп әйләнеү (йөрөү, урап сығыу); **облете́ть Зе́млю** Ер шарын осоп әйләнеү; **облете́ть вокру́г де́рева** ағас тирәләй осоп йөрөү **2.** *кого-что* (*пролететь стороной*) ситләтеп осоп китеү; **я́стреб облете́л гнездо́** ҡарсыға ояны ситләтеп осоп китте **3.** *кого*; *разг.* (*опередить в полёте*) осоп уҙып китеү **4.** *что*; *перен.* (бик тиҙ) таралыу, таралып өлгөрөү; **э́та весть облете́ла весь го́род** был хәбәр бөтә ҡалаға бик тиҙ таралды **5.** *без доп.* ҡойолоп төшөү (бөтөү); **листва́ облете́ла** япраҡтар ҡойолоп бөттө

**ОБЛЕ́ЧЬ I** *сов.* **1.** *кого, во что*; *уст.* кейҙереү, кейендереү **2.** *кого-что*; *прям.*, *перен.* солғау, баҫыу, ҡаплау, томалау, әйләндереү (әүерелдереү); **тума́н облёк пове́рхность о́зера** күл өҫтөн томан солғаны; **обле́чь та́йной** сергә әйләндереү **3.** *что*; һөйләп (әйтеп) биреү, белдереү; **обле́чь содержа́ние в но́вую фо́рму** йөкмәткене яңы формала әйтеп биреү; **обле́чь свои́ мы́сли в слова́** үҙ фекерҙе һүҙҙәр аша белдереү **4.** *кого-что, чем*; *перен.* биреү, тапшырыу; **обле́чь вла́стью** власть биреү ♦ **обле́чь дове́рием** ышанып тапшырыу

**ОБЛЕ́ЧЬ II** *сов.* **1.** *что* ҡаплау, ҡаплап (солғап, уратып, ҡамап) алыу; **ту́чи облегли́ не́бо** болоттар күк йөҙөн солғап алды **2.** *кого-что* (*об одежде*) һылашыу, ятып (һылашып) тороу; **пла́тье пло́тно облегло́ её фигу́ру** күлдәк уның тәненә һылашып тора

**ОБЛЕ́ЧЬСЯ** *сов. во что* **1.** *уст.* кейенеү **2.** кәүҙәләнеү, һүрәтләнеү аша бирелеү; **обле́чься в о́браз Оне́гина** Онегин образында һүрәтләнеү

**ОБЛИВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обли́вать** **2.** (*водная процедура*) һыу (менән) ҡойоноу; **холо́дные облива́ния** һалҡын һыу менән ҡойоноу

**ОБЛИВА́ТЬ** *несов. см.* **обли́ть**

**ОБЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обли́ться** **2.** *страд. от* **облива́ть** ♦ **облива́ться слеза́ми** күҙ йәше түгеү, йәшкә мансылыу; **облива́ться по́том** йән тиргә төшөү, тиргә батыу; **се́рдце кро́вью облива́ется** йөрәк әрней, йөрәккә ҡан һауа

**ОБЛИ́ВКА** *ж*; *спец.* **1.** *см.* **обли́ть** — **облива́ть** **2.** (*глазурь на керамических изделиях*) ялтырауыҡ

**ОБЛИВНО́Й,** -ая, -ое *спец.* ялтырауыҡлы, глазурь йүгертелгән; **обливна́я ми́ска** ялтырауыҡлы сеүәтә

**ОБЛИГАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое облигация …ы; **облигацио́нный заём** облигация заёмы

**ОБЛИГА́ЦИЯ** *ж* облигация

**ОБЛИЗА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ялау, ялап ҡуйыу (бөтөрөү, алыу) **2.** (*очистить*) ялап таҙартыу (ҡуйыу); **облиза́ть ло́жку** ҡалаҡты ялап ҡуйыу ♦ **па́льчики обли́жешь (обли́жете)**: 1) телеңде йоторһоң; 2) *перен.* һоҡландырғыс, иҫ киткес

**ОБЛИЗА́ТЬСЯ** *сов.* (*о животных*) яланыу

**ОБЛИЗНУ́ТЬ** *сов. см.* **обли́зывать**

**ОБЛИЗНУ́ТЬСЯ** *сов.* яланыу, яланып алыу (ҡуйыу)

**ОБЛИ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **облиза́ть**

**ОБЛИ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **облиза́ться** **2.** *на кого-что*; *перен.* (*смотреть с вожделением*) тамшаныу, өмөтләнеп (ымһынып) тороу, өмөтләнеп (ымһынып) көтөп тороу **3.** *страд. от* **обли́зывать**

**О́БЛИК** *м* **1.** килбәт, ҡиәфәт; **прия́тный о́блик** яғымлы ҡиәфәт; **измени́ть о́блик** ҡиәфәтте үҙгәртеү **2.** йөҙ, тәбиғәт; **мора́льный о́блик челове́ка** кешенең әхлаҡи йөҙө **3.** *чего-л.*; *перен.* йөҙ, тышҡы күренеш; **о́блик го́рода** ҡаланың тышҡы күренеше

**ОБЛИНЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** уңыу, төҫөн юғалтыу, тоноҡланыу; **покрыва́ло облиня́ло** япма төҫөн юғалтты **2.** (*о животных*) йөнөн (ябағаһын, баҡтаһын) ҡойоу; (*о птицах*) төләү; **коро́ва облиня́ла** һыйыр баҡтаһын ҡойҙо

**ОБЛИПА́ТЬ** *несов. см.* **обли́пнуть**

**ОБЛИ́ПНУТЬ** *сов. чем*; *разг.* йәбешеү, йәбешеп бөтөү, һырыу; **обли́пнуть сне́гом** ҡар һырыу; **обли́пнуть гря́зью** батҡаҡ йәбешеү

**ОБЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* өҫтөнә һибеү (ҡойоу), ҡойондороу; **обли́ть водо́й** өҫтөнә һыу һибеү **2.** *кого-что* өҫтөнә түгеү (түгеп бысратыу); **обли́ть ска́терть черни́лами** ашъяулыҡты ҡара түгеп бысратыу **3.** *что*; *спец.* тышына яғыу, тышына йүгертеп сығыу, тышын ҡаплау; **обли́ть горшо́к глазу́рью** көршәк тышына глазурь яғыу ♦ **обли́ть гря́зью (помо́ями)** *кого* кеше өҫтөнә бысраҡ ташлау, яла яғыу; **обли́ть презре́нием** *кого* нәфрәтле ҡараш ташлау, ерәнеп ҡарау

**ОБЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡойоноу, ҡойоноп алыу; **обли́ться холо́дной водо́й** һалҡын һыу менән ҡойоноу **2.** батыу, түгеү; **обли́ться по́том** тиргә батыу

**ОБЛИЦЕВА́ТЬ** *сов. что* көпләү, ҡаплау, йөҙләү; **облицева́ть сте́ны мра́мором** стеналарҙы мәрмәр менән йөҙләү

**ОБЛИЦО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **облицева́ть** **2.** (*слой материала, которым облицовывается какая-л.*

*поверхность*) көплөк, йөҙлөк; **мра́морная облицо́вка** мәрмәр йөҙлөк

**ОБЛИЦО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое көпләү (йөҙләү) ...ы; **облицо́вочные рабо́ты** көпләү эштәре; **облицо́вочный ка́мень** йөҙләү ташы

**ОБЛИЦО́ВЩИК** *м* и **ОБЛИЦО́ВЩИЦА** *ж* көпләүсе, йөҙләүсе

**ОБЛИЦО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **облицева́ть**

**ОБЛИЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **обличи́ть** **2.** *что* фаш итеү; **облича́ть взя́точничество** ришүәтселекте фаш итеү; **облича́ть поро́к** боҙоҡлоҡто фаш итеү **3.** *что* белдереү, күрһәтеү, күрһәтеп тороу; **всё э́то облича́ет в нём тала́нт** былар барыһы ла уның талантын күрһәтеп тора

**ОБЛИЧИ́ТЕЛЬ** *м* фаш итеүсе, ғәйебен (йөҙөн) асыусы; **обличи́тель лжи** ялғанлыҡты фаш итеүсе

**ОБЛИЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* фаш итеү ...ы; **обличи́тельная речь** фаш итеү телмәре

**ОБЛИЧИ́ТЬ** *сов. кого* фаш итеү, ғәйебен (йөҙөн) асыу; **обличи́ть престу́пника** енәйәтсене фаш итеү

**ОБЛИ́ЧЬЕ** *с* **1.** *прост.* йөҙ, сырай, килбәт; **ви́дно по обли́чью** йөҙөнән күренеп тора **2.** *перен.* тышҡы күренеш, ҡиәфәт; **различа́ть по обли́чью** тышҡы күренешенән айырыу

**ОБЛОБЫЗА́ТЬ** *сов. кого-что*; *шутл.* үбеү

**ОБЛОБЫЗА́ТЬСЯ** *сов.* үбешеү

**ОБЛОЖЕ́НИЕ** *с см.* **обложи́ть** 3, 4; **обложе́ние медве́дя** айыуҙы ҡамау; **обложе́ние нало́гами** һалым(дар) һалыу

**ОБЛО́ЖЕЧНЫЙ,** -ая, -ое тышлыҡ; **обло́жечная бума́га** тышлыҡ ҡағыҙ

**ОБЛОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тирәләй (яҡ-яғына) һалыу (ҡуйыу, ҡыҫтырыу), тирәләй (яҡ-яғына) һалып (ҡуйып, ҡыҫтырып) сығыу; **обложи́ть больно́го поду́шками** ауырыуҙың яҡ-яғына мендәрҙәр ҡуйыу **2.** *что* ҡаплап (солғап, баҫып) алыу; **ту́чи обложи́ли не́бо** күк йөҙөн болоттар ҡаплап алды **3.** *кого-что* уратып (ҡамап) алыу; **обложи́ть кре́пость** ҡәлғәне ҡамау; **обложи́ть медве́дя в берло́ге** айыуҙы өңөндә ҡамап алыу **4.** *кого-что* һалыу; **обложи́ть да́нью** яһаҡ һалыу

**ОБЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ян-яҡҡа өйөп ҡуйыу (ҡуйып сығыу), тирә-яғына өйөп һалыу (һалып сығыу); **обложи́ться поду́шками** ян-яҡҡа мендәрҙәр өйөп һалып сығыу; **обложи́ться кни́гами** тирә-яғына китаптар өйөп ҡуйыу **2.** ҡапланыу, солғаныу; **не́бо обложи́лось ту́чами** күк йөҙө болот менән ҡапланды

**ОБЛО́ЖКА** *ж* тыш, тышлыҡ; **обло́жка тетра́ди** дәфтәр тышы; **обло́жка па́спорта** паспорт тышлығы

**ОБЛОЖНО́Й:** **обложно́й дождь** *разг.* баҫып яуған ямғыр

**ОБЛОКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **облокоти́ть**

**ОБЛОКА́ЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **облокоти́ться**

**ОБЛОКОТИ́ТЬ** *сов. что* таяныу, терһәккә таяныу; **облокоти́ть ру́ки на стол** ҡулдар менән өҫтәлгә таяныу

**ОБЛОКОТИ́ТЬСЯ** *сов.* таяныу, терһәккә таяныу; **облокоти́ться о подоко́нник** тәҙрә төбөнә таяныу

**ОБЛОМА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һындырыу, һындырып алыу (сығыу, бөтөрөү); **облома́ть сухи́е ве́тки** ҡороған ботаҡтарҙы һындырыу **2.** *кого*; *перен.*, *прост.* бөгөү, (өгөтләп) күндереү, өгөтләү, өгөтләп ипкә килтереү, килештереү, ризалаштырыу; **облома́ть упря́мца** кире кешене өгөтләп ипкә килтереү; **облома́ть по-сво́ему** үҙ яйыңа бөгөү

**ОБЛОМА́ТЬСЯ** *сов.* ватылыу, һыныу, ватылып (һынып) төшөү; **но́гти облома́лись** тырнаҡтар һынып төшкән

**ОБЛОМИ́ТЬ** *сов. что* һындырып алыу (ташлау, төшөрөү); **обломи́ть ве́тку** ботаҡты һындырып ташлау

**ОБЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* һынып (ватылып, емерелеп) төшөү; **пери́ла обломи́лись** яндауыр һынып төшкән

**ОБЛО́МОВЩИНА** *ж* обломовсылыҡ, ихтыярһыҙлыҡ

**ОБЛО́МОК** *м* **1.** һыныҡ, ватыҡ, киҫәк; **обло́мок ста́туи** статуя ватығы **2.** *чего*; *перен.* ҡалдыҡ; **обло́мок про́шлых веко́в** үткән быуаттар ҡалдығы

**ОБЛУПИ́ТЬ** *сов.*; *прост.* **1.** *что* әрсеү, ҡабығын (ҡайырын, ҡыртышын) әрсеү; **облупи́ть яйцо́** йомортҡаның ҡабығын әрсеү **2.** *кого*; *перен.* (*обманом отнять что-л.*) алда(ты)п талау, алда(ты)п талап китеү

**ОБЛУПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡубыу, ҡубып төшөү (сығыу); **кра́ска облупи́лась** буяуы ҡубып төшкән

**ОБЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **облучи́ть**

**ОБЛУЧЕ́НИЕ** *с см.* **облучи́ть**, **облучи́ться**; **радиоакти́вное облуче́ние** радиоактив нурланыш

**ОБЛУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* нурландырыу; **облучи́ть ква́рцем** кварц менән нурландырыу

**ОБЛУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* нурландырылыу; **облучи́ться ква́рцем** кварц менән нурландырылыу

**ОБЛУЧО́К** *м* ҡуҙла, арба (сана) башы

**ОБЛЫСЕ́НИЕ** *с см.* **облысе́ть**

**ОБЛЫСЕ́ТЬ** *сов.* сәс ҡойолоу (ҡойолоп бөтөү), ялтасланыу; **облысе́ть от боле́зни** ауырыуҙан сәс ҡойолоу

**ОБЛЮБОВА́ТЬ** *сов. кого-что* күңелгә оҡшатыу, оҡшағанды һайлау (һайлап алыу); **облюбова́ть себе́ ме́сто** оҡшаған урынды һайлау

**ОБЛЮБО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **облюбова́ть**

**ОБМА́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* һылау, һылап сығыу; **обма́зать печь гли́ной** мейесте балсыҡ менән һылау **2.** *кого-что*; *разг.* (*запачкать*) буяу, бысратыу, буяп (бысратып) бөтөү, һылау, һөртөү; **обма́зать лицо́ са́жей** битте ҡоромға буяу

**ОБМА́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* буялыу, быcраныу, буялып (быcранып) бөтөү, һөртөнөү; **обма́заться кра́ской** буяуға быcраныу

**ОБМА́ЗКА** *ж* **1.** *см.* **обма́зать 2.** (*вещество*) һылау (материалы); **бе́лая обма́зка** аҡ һылау

**ОБМА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **обма́зать**

**ОБМА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обма́заться 2.** *страд. от* **обма́зывать**

**ОБМА́КИВАТЬ** *несов. см.* **обмакну́ть**

**ОБМАКНУ́ТЬ** *сов. что, во что* маныу, манып алыу; **обмакну́ть хлеб в молоко́** икмәкте һөткә манып алыу

**ОБМА́Н** *м* **1.** *см.* **обману́ть 2.** (*заблуждение*) алдаҡ, алданыу, яңылышыу; **впасть в обма́н** алданыу, алдаҡҡа бирелеү; **ввести́ в обма́н** алдатыу, яңылыш юлға төшөрөү; **жить в обма́не** алданып йәшәү **3.** *чего* (*ошибочное представление*) яңылыш, яңылышлыҡ; **обма́н зре́ния** яңылыш күреү; **обма́н чувств** тойғо яңылышлығы

**ОБМА́ННЫЙ,** -ая, -ое алдау ...ы, ялған ...ы; **добы́ть обма́нным спо́собом** ялған юл менән табыу

**ОБМАНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* алдау, алдатыу, ялғанлау, аҡламау; **обману́ть неприя́теля** дошманды алдатыу; **обману́ть покупа́теля** һатып алыусыны алдау; **обману́ть наде́жды** *чьи-л. берәйһенең* өмөтөн өҙөү (аҡламау)

**ОБМАНУ́ТЬСЯ** *сов. в ком-чём* алданыу, аҡланмау; **обману́ться в свое́й наде́жде** өмөтөң аҡланмау; **обману́ться в де́ле** *каком-л. берәй* эштә алданыу

**ОБМА́НЧИВЫЙ,** -ая, -ое алдаусан, алдай торған, ялған, ышаныcһыҙ; **обма́нчивая пого́да** ышаныcһыҙ көн торошо; **обма́нчивый нрав** алдаусан холоҡ; **обма́нчивая вне́шность** ялған ҡиәфәт

**ОБМА́НЩИК** *м* и **ОБМА́НЩИЦА** *ж* алдар, алдаҡсы, ялғансы

**ОБМА́НЫВАТЬ** *несов. см.* **обману́ть**

**ОБМА́НЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обману́ться 2.** *страд. от* **обма́нывать**

**ОБМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **обмота́ть**

**ОБМА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обмота́ться 2.** *страд. от* **обма́тывать**

**ОБМА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **обмахну́ть**

**ОБМА́ХИВАТЬСЯ** *несов. см.* **обмахну́ться**

**ОБМАХНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* елпеү, елпетеү, елпеп алыу **2.** *что* һелкеп (ҡаҡҡылап) төшөрөү; **обмахну́ть пыль с дива́на** дивандың туҙанын ҡаҡҡылап төшөрөү

**ОБМАХНУ́ТЬСЯ** *сов.* елпенеү, елпенеп ҡуйыу (алыу); **обмахну́ться ве́ером** елпеүес менән елпенеү

**ОБМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **обмочи́ть**

**ОБМА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обмочи́ться 2.** *страд. от* **обма́чивать**

**ОБМЕЛЕ́ТЬ** *сов.* һайығыу, һайығайыу; **о́зеро обмеле́ло** күл һайыҡты

**ОБМЕ́Н** *м* **1.** *см.* **обменя́ть**, **обменя́ться 2.** алышыу, алмашыу; **обме́н това́ров** тауар алмашыу; **плани́рование обме́на** алышыуҙы планлаштырыу ♦ **обме́н веще́ств** матдәләр алмашыныуы

**ОБМЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **обменя́ть**

**ОБМЕ́НИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обменя́ться 2.** *страд. от* **обме́нивать**

**ОБМЕНИ́ТЬ** *сов. см.* **обменя́ть**

**ОБМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое алмаштырыу ...ы, алмашыу ...ы; **обме́нный пункт** алмаштырыу пункты; **обме́нный фонд** алмаштырыу фонды

**ОБМЕНЯ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** алмаштырыу, алмашыу; **обменя́ть кни́гу** китап алмаштырыу; **обменя́ть ко́е-каки́е ве́щи на муку́** ҡайһы бер әйберҙәрҙе онға алмаштырыу **2.** (*переменить вещь нечаянно или с умыслом*) алмаштырып алыу (кейеү), алмаштырып алып (кейеп) китеү; **обменя́ть ша́пку** бүректе алмаштырып кейеү

**ОБМЕНЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *кем-чем* алмашыу; **обменя́ться ко́мнатами** бүлмәләрҙе алмашыу; **обменя́ться ту́флями** туфлиҙарҙы алмашыу **2.** *чем*; *перен.* алышыу, бирешеү, уртаҡлашыу; **обменя́ться мне́ниями** фекер алышыу; **обменя́ться о́пытом** тәжрибә уртаҡлашыу; **обменя́ться взгля́дами** ҡарашып алыу; **обменя́ться приве́тствиями** сәләм бирешеү

**ОБМЕ́Р** *м см.* **обме́рить**; **обме́р уча́стка** участка үлсәү

**ОБМЕРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* шаҡ ҡатыу, ҡатып (аптырап) ҡалыу; **обмере́ть от испу́га** ҡурҡыуҙан ҡатып ҡалыу

**ОБМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **обмёрзнуть**

**ОБМЁРЗЛЫЙ,** -ая, -ое боҙланған, боҙ ҡаплаған; **обмёрзлые ступе́ньки** боҙланған баҫҡыстар

**ОБМЁРЗНУТЬ** *сов.*; *разг.* боҙланыу, боҙ ҡатыу (ҡаплау), туңыу; **усы́ обмёрзли** мыйыҡтар боҙланған

**ОБМЕ́РИВАТЬ** *несов. см.* **обме́рить**

**ОБМЕ́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обме́риться 2.** *страд. от* **обме́ривать**

**ОБМЕ́РИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* үлсәү, үлсәп сығыу; **обме́рить по́ле** баҫыуҙы үлсәп сығыу **2.** *кого*; *разг.* дөрөҫ үлсәмәү, алдап кәм үлсәү, үлсәп еткермәү; **обме́рить покупа́теля** һатып алыусыны алдап кәм үлсәү

**ОБМЕ́РИТЬСЯ** и **ОБМЕ́РЯТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яңылыш үлсәү, үлсәгәндә яңылышыу

**ОБМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **обме́рить**

**ОБМЕСТИ́** *сов. что* (*сметая, очистить*) һепереү, һепереп алыу (төшөрөү); **обмести́ ва́ленки ве́ником** быйма өҫтөнән ҡарын һепереү; **обмести́ паути́ну** үрмәксе ауын һепереп төшөрөү

**ОБМЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **обмести́**

**ОБМЕТА́ТЬ II** *сов. что* **1.** типсеп (йүрмәп) сығыу; **обмета́ть швы** йөйҙәрҙе йүрмәп сығыу **2.** *безл.*; *разг.* осоноу, сабыртыу (сәбертеү), са-

быртып (сәбертеп) сығыу; **гу́бы обмета́ло** ирен сабыртып сыҡҡан

**ОБМЁТЫВАТЬ** *несов. см.* **обмета́ть** II

**ОБМИНА́ТЬ** *несов. см.* **обмя́ть**

**ОБМИНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обмя́ться 2.** *страд. от* **обмина́ть**

**ОБМИРА́ТЬ** *несов. см.* **обмере́ть**

**ОБМОЗГОВА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* яҡшылап (төрлө яҡлап) уйлау; **э́то на́до обмозгова́ть** быны яҡшылап уйларға кәрәк

**ОБМОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **обмолоти́ть**

**ОБМО́ЛВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*оговориться*) яңылыш әйтеү; **я не обмо́лвился** мин яңылыш әйтмәнем **2.** (*проговориться*) яңылыш әйтеп ебәреү (ҡуйыу, ташлау); **он боя́лся обмо́лвиться об э́том** ул быны яңылыш әйтеп ебәреүҙән ҡурҡа ине **3.** (*вскользь сказать*) бер һүҙ әйтеү (ысҡындырыу); **об э́той встре́че он ни сло́вом не обмо́лвился** был осрашыу тураһында ул бер һүҙ ҙә ысҡындырманы ♦ **не обмо́лвиться (ни еди́ным) сло́вом (слове́чком)** бер һүҙ ҙә әйтмәү, өндәшмәү

**ОБМО́ЛВКА** *ж* яңылыш әйткән (ысҡындырған) һүҙ, уйламайынса әйтелгән һүҙ

**ОБМОЛО́Т** *м* **1.** *см.* **обмолоти́ть — обмола́чивать 2.** (*количество обмолоченного зерна*) төшөм, һуғып алынған ашлыҡ; **высо́кий обмоло́т** юғары төшөм

**ОБМОЛОТИ́ТЬ** *сов. что* ашлыҡ (иген) һуғыу (һуғып бөтөрөү); **обмолоти́ть зерно́ в сжа́тые сро́ки** ашлыҡты ҡыҫҡа ваҡыт эсендә һуғып бөтөрөү

**ОБМОРА́ЖИВАНИЕ** *с см.* **обмора́живать, обмора́живаться**

**ОБМОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **обморо́зить**

**ОБМОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обморо́зиться 2.** *страд. от* **обмора́живать**

**ОБМОРО́ЖЕНИЕ** и **ОБМОРОЖЕ́НИЕ** *с см.* **обморо́зить, обморо́зиться**

**ОБМОРО́ЗИТЬ** *сов. что* өшөтөү, туңдырыу; **обморо́зить нос** танауҙы өшөтөү

**ОБМОРО́ЗИТЬСЯ** *сов.* өшөү, туңыу, өшөп (туңып) бөтөү; **ребёнок обморо́зился** бала өшөп бөткән

**О́БМОРОК** *м* һуш китеү, һуштан (иҫтән) яҙыу; **коро́ткий о́бморок** бер аҙға һуштан яҙыу; **упа́сть в о́бморок** һуш китеп йығылыу, иҫ юғалтыу

**О́БМОРОЧНЫЙ,** -ая, -ое иҫһеҙ, һуштан (иҫтән) яҙған; **о́бморочное состоя́ние** һуштан яҙған хәлдә булыу

**ОБМОТА́ТЬ** *сов. что* урау, сырмау, урап (сырмап) ҡуйыу; **обмота́ть ше́ю ша́рфом** муйынға шарф урап ҡуйыу

**ОБМОТА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *чем* ураныу, сырманыу, урап (сырмап) ҡуйыу; **обмота́ться полоте́нцем** таҫтамалға ураныу **2.** (*вокруг чего*) сырмалыу

**ОБМО́ТКА** *ж* **1.** *см.* **обмота́ть 2.** урама; **обмо́тка ро́тора** роторҙың урамаһы; **про́волочная обмо́тка** сым урамаһы **3.** *обычно мн.* **обмо́тки** силғау

**ОБМО́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое урау …ы, урама …ы; **обмо́точный цех** урау цехы; **обмо́точный материа́л** урама материалы; **обмо́точный про́вод** урама сымы

**ОБМОЧИ́ТЬ** *сов. что* сылатыу, сылатып алыу, һыулау, еүешләү, еүешләтеү; **обмочи́ть рукава́** еңде сылатыу; **обмочи́ть полоте́нце** таҫтамал еүешләү

**ОБМОЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* сыланыу, һыуланыу, еүешләнеү; **обмочи́ться под дождём** ямғырға сыланыу **2.** *прост.* аҫҡа ебәреү

**ОБМУНДИРОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обмундирова́ть 2.** формалы кейем, обмундирование; **зи́мнее обмундирова́ние** ҡышҡы обмундирование; **солда́тское обмундирова́ние** һалдат обмундированиеһы

**ОБМУНДИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* кейендереү, формалы кейем биреү; **обмундирова́ть призывнико́в** призывниктарға формалы кейем биреү; **обмундирова́ть а́рмию** армияны кейендереү

**ОБМУНДИРОВА́ТЬСЯ** *сов.* обмундирование (формалы кейем) алыу

**ОБМУНДИРО́ВКА** *ж*; *разг.* **1.** *см.* **обмундирова́ть 2.** формалы кейем; **но́вая обмундиро́вка** яңы формалы кейем

**ОБМУНДИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **обмундирова́ть**

**ОБМУНДИРО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обмундирова́ться 2.** *страд. от* **обмундиро́вывать**

**ОБМУРОВА́ТЬ** *сов. что* кирбес менән нығытыу, балсыҡ (цемент) менән (һылап) нығытыу; **обмурова́ть котёл** ҡаҙанды кирбес менән (һылап) нығытыу

**ОБМУРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **обмурова́ть**

**ОБМУСО́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **обмусо́лить**

**ОБМУСО́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обмусо́литься 2.** *страд. от* **обмусо́ливать**

**ОБМУСО́ЛИТЬ** *сов. что*; *разг.* төкөрөкләү

**ОБМУСО́ЛИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* төкөрөкләнеү

**ОБМЫВА́НИЕ** *с см.* **обмыва́ть**

**ОБМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **обмы́ть**

**ОБМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обмы́ться 2.** *страд. от* **обмыва́ть**

**ОБМЫ́ЛОК** *м*; *разг.* һабын ҡалдығы (киҫәге)

**ОБМЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* йыуыу, йыуып таҙартыу, йыуындырыу; **обмы́ть ра́ну** йәрәхәтте йыуыу; **обмы́ть ребёнка** баланы йыуындырыу **2.** *что*; *прост.* йыуыу, йыуып алыу; **обмы́ть пре́мию** премияны йыуыу

**ОБМЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йыуыныу, йыуынып алыу; **обмы́ться под ду́шем** душта йыуыныу **2.** (*стать чистым — о предмете*) йыуылып таҙарыу, йыуылыу

**ОБМЯКА́ТЬ** *несов. см.* **обмя́кнуть**

**ОБМЯ́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** йомшарыу, ебеү, иҙелеү; **хлеб от сы́рости обмя́к** икмәк ебегән **2.** (*стать вялым*) әлһерәү, мәлйерәү, бәлтерәү, иҙрәү, әлһерәп китеү, мәлйерәп (бәлтерәп) төшөү; **обмя́кнуть от уста́лости** арыуҙан әлһерәү; **ру́ки её внеза́пно обмя́кли** ҡулдары ҡапыл бәлтерәп төштө **3.** *перен.* (*смягчиться*) күңел йомшарыу (иреү), йомшара төшөү; **он, наконе́ц, обмя́к** аҙаҡ ул килеп, йомшара төштө; **обмя́кнуть от ле́сти** ялағайланып маҡтауҙан күңел йомшарыу

**ОБМЯ́ТЬ** *сов. что* тапау, баҫыу, иҙеү, ойпалау, таушалдырыу; **обмя́ть се́но** бесәнде тапау; **обмя́ть поду́шку** мендәрҙе иҙеү; **обмя́ть ткань** туҡыманы таушалдырыу

**ОБМЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тапалыу, баҫылыу, иҙелеү, ойпаланыу, таушалыу; **се́но обмя́лось** бесән баҫылған (тапалған); **пальто́ обмя́лось** пальто таушалған **2.** йомшарыу, яйланыу, кәлепләнеү, йәтешләнеү, ҡулайланыу; **сапоги́ обмя́лись** итек кәлепләнеп киткән

**ОБНАГЛЕ́ТЬ** *сов.* оятһыҙланыу, әҙәпһеҙ (тәртипһеҙ) ҡыланыу

**ОБНАДЁЖИВАТЬ** *несов. см.* **обнадёжить**

**ОБНАДЁЖИТЬ** *сов. кого* өмөтләндереү, ышандырыу, өмөтләндереп (ышандырып) тынысландырыу; **обнадёжить больно́го** ауырыуҙы өмөтләндереү; **отве́т его́ обнадёжил** яуап уны ышандырҙы

**ОБНАЖА́ТЬ** *несов. см.* **обнажи́ть**

**ОБНАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обнажи́ться** **2.** *страд. от* **обнажа́ть**

**ОБНАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обнажи́ть** — **обнажа́ть**, **обнажи́ться** — **обнажа́ться**; **обнаже́ние корне́й де́рева** ағас тамырҙарын асыу; **обнаже́ние фла́нгов** флангыларҙы асыу **2.** *геол.* асылып (яланғасланып) күренеп ятҡан ер (урын)

**ОБНАЖЁННЫЙ**, -ая, -ое **1.** *прич. от* **обнажи́ть** **2.** *прил.* яланғас, асыҡ, шәрә; **обнажённые ру́ки** яланғас ҡулдар **3.** *прил.* яланғас, ҡола, асыҡ; **обнажённые дере́вья** яланғас ағастар; **обнажённая степь** ҡола дала; **обнажённая ме́стность** асыҡ урын **4.** *прил.* өҫкә сығып ятҡан (*тау тоҡомона ҡарата*) **5.** *прил.*; *перен.* асыҡтан-асыҡ; **обнажённый цини́зм** асыҡтан-асыҡ оятһыҙлыҡ

**ОБНАЖИ́ТЬ** *сов. что* **1.** асыу, яланғаслау, шәрә ҡалдырыу, асыҡ (яланғас) ҡалдырыу, һалыу; **обнажи́ть пле́чи** ҡулбаштарҙы асыҡ ҡалдырыу; **обнажи́ть го́лову** баш кейемен һалыу; **о́сень обнажи́ла дере́вья** көҙ ағастарҙы яланғасландырҙы **2.** һурыу, һурып (тартып) сығарыу; **обнажи́ть меч** ҡылысты ҡынынан һурып сығарыу **3.** *перен.* (*раскрыть*) асыу, асып һалыу, фаш итеү; **обнажи́ть недоста́тки** етешһеҙлектәрҙе асып һалыу; **обнажи́ть зло** яманлыҡты фаш итеү

**ОБНАЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу, яланғасланыу, шәрәләнеү, асыҡ (яланғас, шәрә) ҡалыу; **лес обнажи́лся** урман яланғасланды; **ко́рни обнажи́лись** тамырҙар асылды; **го́ры обнажи́лись** тауҙар яланғас ҡалды **2.** *перен.* (*раскрыться*) асылыу, беленеү, фаш ителеү

**ОБНАРО́ДОВАТЬ** *сов.* халыҡҡа белдереү (иғлан итеү, еткереү); **обнаро́довать ука́з** указды халыҡҡа иғлан итеү

**ОБНАРУ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **обнару́жить**

**ОБНАРУ́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обнару́житься** **2.** *страд. от* **обнару́живать**

**ОБНАРУ́ЖИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*показать, проявить*) күрһәтеү, белдереү; **обнару́жить жела́ние** теләк белдереү; **обнару́жить свою́ ра́дость** шатлығыңды күрһәтеү **2.** *кого-что* (*найти*) табыу; **обнару́жить проти́вника** дошманды табыу; **обнару́жить ру́копись** ҡулъяҙманы табыу **3.** *что* (*раскрыть*) асыу, асып һалыу, белеү; **обнару́жить преступле́ние** енәйәтте асыу; **обнару́жить поте́рю докуме́нтов** документтарҙың юғалыуын белеү

**ОБНАРУ́ЖИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать видимым, явным, проявиться*) беленеү, күренеү, билдәле булыу; **у ма́льчика обнару́жилась скло́нность к рисова́нию** малайҙың рәсем төшөрөүгә һәләте беленде; **та́йна вско́ре обнару́жилась** сер тиҙҙән билдәле булды **2.** (*найтись*) табылыу, килеп сығыу; **пропа́вшая кни́га обнару́жилась** юғалған китап табылды

**ОБНА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **обноси́ть** I 1

**ОБНА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обноси́ться** 2; **2.** *страд. от* **обна́шивать**

**ОБНЕСТИ́** *сов.* **1.** *что, чем* (*огородить*) ҡоймалап (кәртәләп, ситәнләп, текмәләп) алыу; **обнести́ двор забо́ром** йорт-ҡураны ҡоймалап алыу **2.** (*угостить*) өләшеп (таратып) сығыу; **обнести́ госте́й ча́ем** ҡунаҡтарға сәй таратып сығыу **3.** *кого* (*пропустить при угощении*) бирмәй үтеп китеү, буш ҡалдырыу

**ОБНИМА́ТЬ** *несов. см.* **обня́ть**

**ОБНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обня́ться** **2.** *страд. от* **обнима́ть**

**ОБНИ́МКА: в обни́мку** ҡосаҡлашып

**ОБНИЩА́ЛЫЙ**, -ая, -ое хәйерселәнгән, хәйерселеккә төшкән

**ОБНИЩА́НИЕ** *с см.* **обнища́ть**

**ОБНИЩА́ТЬ** *сов.* хәйерселәнеү, хәйерселеккә төшөү

**ОБНО́ВА** *ж*; *разг. см.* **обно́вка**

**ОБНОВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** яңыртыу, яңылыҡ индереү, яңы төҫ индереү (биреү); **обнови́ть забо́р** ҡойманы яңыртыу; **обнови́ть жизнь** тормошто яңыртыу **2.** *перен.* яңыртыу, (яңынан хәтергә) ҡайтарыу **3.** *разг.* беренсе тапҡыр кейеү (кейеп сығыу); **обнови́ть пла́тье** күлдәкте беренсе тапҡыр кейеп сығыу



24 зак. 2.0084.05

**ОБНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* яңырыу; **край обнови́лся** төйәк (ил) яңырҙы; **жизнь обнови́лась** тормош яңырҙы; **приро́да обнови́лась** тәбиғәт яңырҙы; **репертуа́р обнови́лся** репертуар яңырҙы; **това́рищество обнови́лось но́выми чле́нами** ширҡәт яңы ағзалар иҫәбенә яңырҙы

**ОБНО́ВКА** *ж* яңы кейем (әйбер); **наде́ть обно́вку** яңы кейем кейеү

**ОБНОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **обнови́ть**, **обнови́ться**; **обновле́ние оде́жды** кейем-һалымды яңыртыу; **обновле́ние репертуа́ра** репертуарҙы яңыртыу; **обновле́ние приро́ды** тәбиғәт яңырыуы

**ОБНОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **обнови́ть**

**ОБНОВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обнови́ться** **2.** *страд. от* **обновля́ть**

**ОБНОСИ́ТЬ I** *сов. что*; *прост.* **1.** кейеп кәлепләү (таманлау, иплəү, яйлау); **обноси́ть но́вые ту́фли** яңы туфлиҙарҙы кейеп таманлау **2.** кейеп туҙҙырыу, туҙҙырып бөтөрөү; **обноси́ть сапоги́** итекте кейеп туҙҙырыу

**ОБНОСИ́ТЬ II** *несов. см.* **обнести́**

**ОБНОСИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*кейем-һалым һ.б.*) туҙыу, иҫкереү, туҙып (иҫкереп) бөтөү; **лю́ди си́льно обноси́лись** кешеләрҙең кейем-һалымы туҙҙы; **пальто́ обноси́лось** пальто туҙып бөткән **2.** (*стать удобным в результате носки*) кейелеп кәлепләнеү, иплəнеү, яйланыу; **дже́мпер ещё не обноси́лся** джемпер әлегәсә кейелеп кәлепләнмәгән

**ОБНО́СКИ** *мн.* (*ед.* **обно́сок** *м*); *разг.* иҫке кейем, иҫке-моҫҡо; **ходи́ть в обно́сках** иҫке кейемдә йөрөү

**ОБНЮ́ХАТЬ** *сов. кого-что* еҫкәү, еҫкәп сығыу

**ОБНЮ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **обню́хать**

**ОБНЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡосаҡлау, ҡосаҡлап алыу; **обня́ть ребёнка** баланы ҡосаҡлау **2.** *перен.* (*охватить — о пламени, тьме и т.п.*) солғау, ҡаплау, солғап (ҡаплап) алыу; **пла́мя обня́ло дом** ялҡын өйҙө солғап алды **3.** *что*; *перен.* (*осмыслить, постичь*) аңлау, төшөнөү, белеү, белеүгә (аңлауға) ирешеү; **обня́ть вели́чие по́двига** батырлыҡтың бөйөклөгөн аңлау

**ОБНЯ́ТЬСЯ** *сов.* ҡосаҡлашыу; **обня́ться при встре́че** осрашҡанда ҡосаҡлашыу

**ОБО** *предлог см.* **о** I

**ОБО...** *приставка см.* **о...**

**ОБОБРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *прост.* (*собрать*) йыйып (тиреп, өҙөп алып) бөтөрөү; **обобра́ть огурцы́ с гря́дки** ҡыярҙы түтәлдән йыйып бөтөрөү **2.** *кого-что*; *разг.* (*обманом отнять всё имущество*) талау, тунау, талап алыу (бөлдөрөү), талап бөлгөнлөккә төшөрөү; **обобра́ть до ни́тки** бөтә (бар) мөлкәтен талап алыу ♦ **обобра́ть как ли́пку** *прост.* яланғас ҡалдырыу, бөтә нәмәһен талап алыу

**ОБОБРА́ТЬСЯ: не обобра́ться** (*только с отриц.*) *кого-что*; *разг.* ҡотола алмаҫлыҡ булыу, йыйып бөтөрә алмаҫлыҡ (бөтмәҫ-төкәнмәҫ, бик күп) булыу; **хлопо́т не оберёшься** бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәт

**ОБОБЩА́ТЬ** *несов. см.* **обобщи́ть**

**ОБОБЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обобщи́ть** **2.** (*положение общего характера*) нәтижә, һөҙөмтә, һығымта; **широ́кие обобще́ния** киң күләмдәге һөҙөмтәләр

**ОБОБЩЕСТВИ́ТЬ** *сов. кого-что* дөйөмләштереү, йәмәғәт милкенә әйләндереү; **обобществи́ть сре́дства произво́дства** етештереү сараларын дөйөмләштереү; **обобществи́ть зе́млю** ерҙе йәмәғәт милкенә әйләндереү

**ОБОБЩЕСТВИ́ТЬСЯ** *сов.* дөйөмләшеү, йәмәғәт милкенә әйләнеү

**ОБОБЩЕСТВЛЕ́НИЕ** *с см.* **обобществи́ть**, **обобществи́ться**

**ОБОБЩЕСТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **обобществи́ть**

**ОБОБЩЕСТВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обобществи́ться** **2.** *страд. от* **обобществля́ть**

**ОБОБЩИ́ТЬ** *сов.* дөйөмләштереү, йомғаҡлау; **обобщи́ть предложе́ния** тәҡдимдәрҙе дөйөмләштереү; **обобщи́ть о́пыт рабо́ты** эш тәжрибәһен дөйөмләштереү

**ОБОВШИ́ВЕТЬ** *сов.* бетләү, бетләп бөтөү

**ОБОГАТИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** байыҡтырыусы (*белгес*); **бу́дущий обогати́тель** буласаҡ байыҡтырыусы **2.** (*вещество*) байыҡтырғыс (*матдә*); **обогати́тели по́чвы** тупраҡты байыҡтырғыстар

**ОБОГАТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое байыҡтырыу ...ы; **обогати́тельная фа́брика** байыҡтырыу фабрикаһы; **обогати́тельные маши́ны** байыҡтырыу машиналары

**ОБОГАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* байытыу, байыҡтырыу; **обогати́ть страну́** илде байытыу; **обогати́ть руду́** мәғдәнде байыҡтырыу **2.** *что* (*сделать богаче по составу, содержанию*) байыҡтырыу, үҫтереү, арттырыу; **обогати́ть свой о́пыт** үҙ тәжрибәңде арттырыу

**ОБОГАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** байыу, байып китеү; **литерату́ра обогати́лась но́вым рома́ном** әҙәбиәт яңы романға байыны; **обогати́ться зна́ниями** белем менән байыу **2.** (*стать обогащённым — о почве, руде и т.п.*) байығыу, байыҡтырылыу, байытылыу; **по́чва обогати́лась азо́том** тупраҡ азотҡа байыҡтырылды

**ОБОГАЩА́ТЬ** *несов. см.* **обогати́ть**

**ОБОГАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обогати́ться** **2.** *страд. от* **обогаща́ть**

**ОБОГАЩЕ́НИЕ** *с см.* **обогати́ть**, **обогати́ться**

**ОБОГНА́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям.* и *перен.*, *разг.* уҙып китеү; **обогна́ть на полпути́** ярты юлда уҙып китеү

**ОБОГНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** бөгөү, һуғыу, кейҙереү, бөгөп кейҙереү (ҡуйыу); **обогну́ть о́бруч вокру́г бо́чки** мискәгә ҡоршау һуғыу; **обо-**

**гну́ть колесо́ ши́ной** тәгәрмәскә шина һуғыу (кейҙереү) **2.** (*обойти, объехать*) уратып (ситләтеп) үтеү; **обогну́ть мыс** морондо ситләтеп үтеү

**ОБОГОТВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* алла тип таныу, алла кеүек күреү, табыныу; **обоготвори́ть челове́ка** кешене алла кеүек күреү

**ОБОГОТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **обоготвори́ть**

**ОБОГРЕ́В** *м*; *спец. см.* **обогре́ть** — **обогрева́ть, обогре́ться** — **обогрева́ться**

**ОБОГРЕВА́ТЕЛЬ** *м* йылытҡыс; **электри́ческий обогрева́тель** электр йылытҡысы

**ОБОГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **обогре́ть**

**ОБОГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обогре́ться 2.** *страд. от* **обогрева́ть**

**ОБОГРЕ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* йылытыу; **обогре́ть помеще́ние** бинаны йылытыу

**ОБОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* йылыныу; **дом обогре́лся** өй йылынды

**О́БОД** *м* **1.** туғын; **о́бод колеса́** тәгәрмәс туғыны **2.** (*круглая или дугообразная скрепа*) сит, тирәс, ҡоршау; **о́бод бло́ка** блок ҡоршауы; **о́бод си́та** иләк тирәсе

**ОБОДО́К** *м* **1.** *уменьш. от* **о́бод** 2; **2.** (*каёмка*) ҡайма; **конве́рт с кра́сным ободко́м** ҡыҙыл ҡаймалы конверт

**ОБО́ДРАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ободра́ть 2.** *прил.*; *разг.* (*рваный, ветхий*) йыртылған, иҫкергән, туҙған; **обо́дранные обо́и** йыртылған обойҙар **3.** *прил.*; *разг.* (*в лохмотьях*) йыртыҡ (иҫке) кейемле; **обо́дранный пу́тник** йыртыҡ кейемле юлаусы

**ОБОДРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һыҙырыу, ҡайыҙлау, ҡуптарыу; **ободра́ть кору́ с де́рева** ағастың ҡабығын һыҙырыу **2.** *кого* (*снять шкуру*) тунау; **ободра́ть овцу́** һарыҡ тунау **3.** *что*; *разг.* (*поцарапать*) сыйыу, һыҙырыу; **ободра́ть лицо́** битте сыйыу **4.** *что*; *разг.* (*обтрепать*) йыртыу, туҙҙырыу, йыртып (туҙҙырып) бөтөрөү; **ободра́ть оби́вку** көптө йыртып бөтөрөү; **ободра́ть пиджа́к** пинжәк туҙҙырыу **5.** *кого*; *перен., прост. см.* **обобра́ть** 2

**ОБОДРА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һыҙырылыу, ҡубыу, ҡубып төшөү; **кора́ на де́реве ободрала́сь** ағастың ҡабығы һыҙырылған; **кра́ска ободрала́сь** буяуы ҡупҡан **2.** *разг.* (*изорваться, обтрепаться*) йыртылыу, туҙыу, йыртылып (туҙып) бөтөү; **пла́тье совсе́м ободрало́сь** күлдәк бөтөнләй йыртылып бөткән

**ОБОДРЕ́НИЕ** *с см.* **ободри́ть**; **слова́ ободре́ния** рухландырыу һүҙҙәре

**ОБОДРИ́ТЬ** *сов. кого-что* рухландырыу, дәртләндереү, рухын (күңелен) күтәреү; **э́то изве́стие его́ ободри́ло** был хәбәр уның күңелен күтәрҙе

**ОБОДРИ́ТЬСЯ** *сов.* күңел (рух) күтәрелеү, дәртләнеү; **он успоко́ился и ободри́лся** ул тынысланды һәм күңеле күтәрелде

**ОБОДРЯ́ТЬ** *несов. см.* **ободри́ть**

**ОБОДРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ободри́ться 2.** *страд. от* **ободря́ть**

**ОБОДРЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **ободря́ть 2.** *прил.* күңел күтәргес, рухландырғыс, дәртләндергес; **ободря́ющий тон** рухландырғыс тон; **ободря́ющие слова́** дәртләндергес һүҙҙәр

**ОБОЕПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое *биол.* ике енесле; **обоепо́лый цвето́к** ике енесле сәскә

**ОБОЖА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обожа́ть** 1; **2.** (*любовь, доходящая до преклонения*) сиктән тыш көслө (ҡайнар) мөхәббәт; **окружи́ть обожа́нием** сиктән тыш (көслө мөхәббәт менән) яратыу, оло ихтирам күрһәтеү

**ОБОЖА́ТЕЛЬ** *м*; *разг.*, *шутл.* өҙөлөп яратыусы (һөйөүсе); **толпа́ обожа́телей** табыныусылар (яратыусылар) төркөмө

**ОБОЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* (*преклоняться*) өҙөлөп һөйөү (яратыу) **2.** *что*; *прост.* яратыу, бик яратыу; **обожа́ть фру́кты** емеш бик яратыу

**ОБОЖДА́ТЬ** *сов. кого-что* и *без доп.*; *разг.* көтөп тороу, көтә береү; **обожди́ мину́тку** бер минут ҡына көтөп тор

**ОБОЖЕСТВИ́ТЬ** *сов. кого-что* алла кеүек күреү, илаһилаштырыу, алла тип таныу (ҡарау); **обожестви́ть си́лы приро́ды** тәбиғәт көстәрен илаһилаштырыу

**ОБОЖЕСТВЛЕ́НИЕ** *с см.* **обожестви́ть**

**ОБОЖЕСТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **обожестви́ть**

**ОБО́З** *м* **1.** (*группа повозок*) ылау; **обо́зы с се́ном** бесән тейәгән ылауҙар **2.** *спец.* ылау, обоз; **пожа́рный обо́з** янғын һүндереү ылауы; **артиллери́йский обо́з** артиллерия обозы ♦ **тяну́ться (быть, плести́сь) в обо́зе** артта барыу, арттан һөйрәлеү

**ОБОЗВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тип атау, исем(е) тағыу, үсекләү; **обозва́ть лгуно́м** ялғансы исеме тағыу

**ОБОЗЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* асыуландырыу, асыуын килтереү (ҡабартыу); **э́то его́ си́льно обозли́ло** был уны ныҡ асыуландырҙы

**ОБОЗЛИ́ТЬСЯ** *сов.* асыуланыу, асыу килеү (ҡабарыу); **обозли́ться на сосе́да** күршегә асыуланыу

**ОБОЗНА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яңылышыу (*таныш булмаған кешене, әйберҙе таныш кешегә йәки әйбергә оҡшатып алданыу*); **я, ка́жется, обозна́лся** мин яңылыштым, буғай

**ОБОЗНАЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **обозна́чить** 1; **2.** (*значить*) аңлатыу, белдереү, күрһәтеү; **что обознача́ет э́тот знак?** был билдә нимә белдерә?

**ОБОЗНАЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обозна́читься 2.** *страд. от* **обознача́ть** 1

**ОБОЗНАЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обозна́чить** 1; **обозначе́ние маршру́та на ка́рте** маршрут йүнәлешен картала билдәләү **2.** (*знак, метка*) билдә, тамға; **усло́вные обозначе́ния** шартлы тамғалар

**ОБОЗНА́ЧИТЬ** *сов. что* **1.** билдәләү, тамғалау, билдәләп (тамғалап) сығыу, билдә (тамға) ҡуйыу; **обозна́чить грани́цы уча́стка** участка сиктәрен билдәләү; **непра́вильно обозна́чить вре́мя** ваҡытты дөрөҫ билдәләмәү **2.** (*сделать заметным*) белдереү, күрһәтеү, һыҙатландырыу, беленерлек итеү, беленеп торорлоҡ итеү; **пла́тье обозна́чило фигу́ру** күлдәк буй-һынды белендереп торҙо

**ОБОЗНА́ЧИТЬСЯ** *сов.* күренеү, беленеү, төҫмөрләнеү, күренә (беленә) башлау; **обозна́чились воро́та** ҡапҡа төҫмөрләнде; **на лбу обозна́чились морщи́ны** маңлайҙа йыйырсыҡтар күренә башланы

**ОБО́ЗНИК** *м* ылаусы, йөксө

**ОБО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ылау ...ы, йөк ...ы; **обо́зные ло́шади** ылау аттары; **обо́зные изде́лия** ылау кәрәк-ярағы **2.** *в знач. сущ.* **обо́зный** *м* ылаусы, йөксө

**ОБОЗРЕВА́ТЕЛЬ** *м* күҙәтеүсе, күҙәтеү яһаусы, күҙәтеп барыусы; **полити́ческий обозрева́тель** сәйәси күҙәтеү яһаусы; **спорти́вный обозрева́тель** спорт күҙәтеүсеһе

**ОБОЗРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **обозре́ть**

**ОБОЗРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обозре́ть**; **обозре́ние звёздного не́ба** күктәге йондоҙҙарҙы күҙәтеү **2.** күҙәтеү; **литерату́рное обозре́ние** әҙәби күҙәтеү; **междунаро́дное обозре́ние** халыҡ-ара күҙәтеү **3.** (*вид эстрадного или театрального представления*) тамаша

**ОБОЗРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*осмотреть*) байҡап (ҡарап, күҙ йөрөтөп) сығыу; **обозре́ть ме́стность** тирә-яҡты байҡап сығыу **2.** *перен.* күҙәтеү, тикшереү, тикшереп (ҡарап) сығыу; **обозре́ть ход собы́тий** ваҡиғаларҙың үҫешен тикшереү

**ОБОЗРИ́МЫЙ,** -ая, -ое ҡарап сығырлыҡ, күҙ күреме етерлек; **обозри́мое простра́нство** күҙ күреме етерлек ер

**ОБО́И** *только мн.* обой; **но́вые обо́и** яңы обой

**ОБО́ЙМА** *ж* **1.** *воен.* обойма, патрон ҡыҫаһы; **расстреля́ть всю обо́йму** бөтә обойманы атып бөтөрөү **2.** *спец.* атлама

**ОБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое **1.** обой ...ы; **обо́йный клей** обой елеме **2.** тышлау ...ы, көпләү ...ы, тышлыҡ ...ы, көплөк ...ы; **обо́йные гво́зди** көпләү ҡаҙауы

**ОБОЙТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* тирәләп әйләнеү, йөрөп сығыу, әйләнеп урап (йөрөп) сығыу; **обойти́ па́мятник** һәйкәлде тирәләп әйләнеү; **обойти́ весь уча́сток** бөтә участканы әйләнеп йөрөп сығыу; **обойти́ всех знако́мых** барлыҡ таныштарҙы йөрөп сығыу **2.** *что* (*пройти стороной*) ситләтеп (урап, уратып) уҙыу, ситләтеп (урап, уратып) үтеү; **обойти́ боло́то** һаҙҙы ситләтеп үтеү **3.** *кого-что*; *перен.* (*миновать*) ҡағылмау, теймәү, эләкмәү; **сча́стье её обошло́** уға бәхет эләкмәне **4.** *что*; *перен.* (*избежать в разговоре*) әйтмәү, әйтмәй ҡалыу (китеү, үтеү), ҡағылмау, һүҙ сығармау (ҡуптармау); **обойти́ про́сьбу молча́нием** үтенес тураһында һүҙ ҡуптармау **5.** *что*; *перен.* (*уклониться от исполнения*) урап (ситләтеп) үтеү; **обойти́ зако́н** законды урап үтеү **6.** *кого, чем*; *перен.* (*оставить без повышения, награды и т.п.*) мәхрүм итеү, бирмәй (ситтә, төшөрөп) ҡалдырыу; **обойти́ пре́мией** премия бирмәй ҡалдырыу; **обойти́ по слу́жбе** хеҙмәттә дәрәжә күтәреүҙә төшөрөп ҡалдырыу **7.** *кого-что*; *перен.* (*распространиться*) таралыу, йәйелеү, барып етеү, мәғлүм булыу; **слух обошёл весь го́род** хәбәр бөтә ҡалаға таралды **8.** *кого*; *прям.*, *перен.*, *разг.* (*опередить*) уҙып китеү, алға сығыу, артта ҡалдырыу; **обойти́ трёх спортсме́нов** өс спортсыны уҙып китеү; **обойти́ сосе́днее звено́** күрше звеноны артта ҡалдырыу **9.** *кого-что*; *воен.* (*зайти в тыл*) тылға кереү (инеү), әйләнеп артына төшөү; **обойти́ проти́вника** дошмандың тылына кереү

**ОБОЙТИ́СЬ** *сов.* **1.** *с кем-чем* мөғәмәлә (эш) итеү, ҡарау; **пло́хо обойти́сь** насар мөғәмәлә итеү **2.** *во что*; *разг.* төшөү; **костю́м обошёлся недо́рого** костюм арзанға төштө **3.** *без кого-чего, кем-чем*; *разг.* ҡәнәғәтләнеү, ҡәнәғәт булыу, етеү, еткереү, -һыҙ ҙа/-һеҙ ҙә тороу; **обойти́сь без маши́ны** машинаһыҙ ҙа тороу; **обойти́сь прошлого́дними запа́сами** былтырғы һаҡламдарҙы еткереү **4.** -һыҙ/-һеҙ булыу, үтеү, үтеп китеү; **всё обошло́сь благополу́чно** бөтәһе лә имен-аман үтеп китте; **мо́жет, все обойдётся** бәлки, барыһы ла яҡшы үтеп китер; **прогу́лка не обошла́сь без приключе́ний** прогулка мажараһыҙ ғына үтеп китмәне **5.** *без кого-чего*; *разг.* (*с отрицанием "не"*) ҡатнашы булыу, ҡатнашыу; **без него́ тут не обошло́сь** уның бында ҡатнашы булмай булмаған ♦ **обойти́сь в копе́ечку** бик ҡыйбатҡа төшөү

**ОБО́ЙЩИК** *м* обойсы, көпләүсе

**ОБОКРА́СТЬ** *сов. кого-что* урлау, урлап (талап) сығыу; **обокра́сть пассажи́ра** пассажирҙың әйберен урлау; **обокра́сть кварти́ру** фатир талап сығыу

**ОБОЛГА́ТЬ** *сов. кого-что* яла (ҡара, бысраҡ) яғыу, өҫтөнән һөйләү; **оболга́ть че́стного рабо́тника** намыҫлы хеҙмәткәргә яла яғыу

**О́БОЛОНЬ** *ж*; *бот.* ашҡаяҡ

**ОБОЛО́ЧКА** *ж* **1.** ҡабыҡ, тыш; **оболо́чка зерна́** орлоҡтоң ҡабығы **2.** ҡабыҡ, ҡыртыш; **твёрдая оболо́чка Земли́** Ерҙең ҡаты ҡыртышы **3.** *анат.* тиресә, ҡатлам, яры; **надко́стная оболо́чка** һөйәк ярыһы; **сли́зистая оболо́чка** лайлалы тиресә; **мы́шечная оболо́чка се́рдца** йөрәктең мускул ҡатламы **4.** (*вместилище для газа у аэростатов и т.п.*) тыш, көплөк; **оболо́чка дирижа́бля** дирижаблдең тышы **5.** *чего, какая*; *перен.* тышлыҡ, ҡиәфәт; **служи́ть защи́тной оболо́чкой** һаҡлаусы тышлыҡ булыу

**ОБОЛЬСТИ́ТЕЛЬ** *м* и **ОБОЛЬСТИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* вәсүәсәсе, һоҡландырып үҙенә ҡаратыусы, ҡыҙыҡтырып алдатыусы (юлдан яҙҙырыусы)

**ОБОЛЬСТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һоҡландырғыс, ҡыҙыҡтырғыс, йәлеп иткес, үтә һөйкөмлө; **обольсти́тельная де́вушка** үтә һөйкөмлө ҡыҙ; **обольсти́тельная улы́бка** һоҡландырғыс йылмайыу

**ОБОЛЬСТИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** (*увлечь, пленить чем-л.*) алдап һоҡландырыу, һоҡландырып үҙенә ҡаратыу **2.** *уст.* (*обесчестить*) алдау, хур (мыҫҡыл) итеү

**ОБОЛЬСТИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡыҙығып алданыу; **обольсти́ться красото́й** матурлыҡҡа ҡыҙығып алданыу; **не обольсти́ться успе́хами** уңыштарға ҡыҙығып алданмау

**ОБОЛЬЩА́ТЬ** *несов. см.* **обольсти́ть**

**ОБОЛЬЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обольсти́ться** **2.** *страд. от* **обольща́ть**

**ОБОМЛЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* иҫ китеү, шаҡ ҡатыу, телһеҙ (өнһөҙ) ҡалыу; **обомле́ть от испу́га** ҡурҡыуҙан телһеҙ ҡалыу

**ОБОМШЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое мүкләнгән, мүк баҫҡан (ҡаплаған); **обомше́лый пень** мүкләнгән төп; **обомше́лые сте́ны** мүк ҡаплаған диуарҙар

**ОБОМШЕ́ТЬ** *сов.* мүкләнеү, мүк баҫыу (ҡаплау); **кры́ша обомше́ла** түбә мүкләнгән

**ОБОНЯ́НИЕ** *с* еҫ һиҙеү (тойоу) һәләте, еҫ һиҙеү (тойоу) ...ы; **о́рганы обоня́ния** еҫ һиҙеү ағзалары

**ОБОНЯ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое еҫ һиҙеү ...ы; **обоня́тельный нерв** еҫ һиҙеү нервыһы

**ОБОНЯ́ТЬ** *несов. что* еҫ һиҙеү (тойоу); **обоня́ть за́пах ды́ма** төтөн еҫен һиҙеү

**ОБОРА́ЧИВАЕМОСТЬ** *ж* әйләнеш, йөрөш, әйләнештә (йөрөштә, юлда) булыу, әйләнеп ҡайтыу ваҡыты; **обора́чиваемость това́ров** тауар әйләнеше; **уско́рить обора́чиваемость ваго́нов** вагондарҙың әйләнеп ҡайтыу ваҡытын ҡыҫҡартыу

**ОБОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **оберну́ть**

**ОБОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оберну́ться** **2.** *страд. от* **обора́чивать**

**ОБОРВА́НЕЦ** *м*; *разг.* йолҡош

**ОБО́РВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **оборва́ть** **2.** *прил.* өҙөк-йыртыҡ, йыртыҡ, алама, йолҡошланып бөткән; **обо́рванная оде́жда** йыртыҡ кейем; **обо́рванный пу́тник** йолҡошланып бөткән юлаусы **3.** *прил.*; *разг.* (*незаконченный*) өҙөк-өҙөк; **обо́рванные мы́сли** өҙөк-өҙөк уйҙар

**ОБОРВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* өҙөү, өҙөп сығыу (алыу, бөтөрөү); **оборва́ть я́блоки** алмаларҙы ағасынан өҙөп алыу **2.** *что* өҙөү, тартып өҙөү; **оборва́ть ни́тку** епте өҙөү **3.** *что*; *перен.* кинәт (ҡапыл) туҡтатыу (бүлеү, бүлдереү); **оборва́ть разгово́р на полусло́ве** һөйләшеүҙе ярты һүҙҙән ҡапыл туҡтатыу; **оборва́ть речь** һүҙҙе кинәт бүлеү **4.** *кого*; *перен., разг.* (*заставить замолчать*) ҡырт киҫеү

**ОБОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** өҙөлөү, өҙөлөп сығыу (китеү); **верёвка оборвала́сь** бау өҙөлдө **2.** ҡолап (осоп, йығылып) төшөү; **оборва́ться с моста́** күперҙән йығылып төшөү; **оборва́ться с ло́шади** аттан ҡолап төшөү **3.** *перен.* өҙөлөү, ҡапыл туҡтау (туҡталыу, тыныу); **пе́сня оборвала́сь** йыр ҡапыл туҡтаны; **го́лос её вдруг оборва́лся** уның тауышы ҡапыл тынды **4.** *разг.* (*обноситься*) йолҡошланыу, өҫ-баш туҙып бөтөү

**ОБО́РВЫШ** *м*; *разг.* йолҡош, өтөк

**ОБО́РКА** *ж* бала итәк, ҡатмар, әүеркә; **пла́тье с обо́рками** ҡатмарлы күлдәк; **наши́ть обо́рки** ҡатмар һалыу

**ОБОРО́НА** *ж* **1.** *см.* **обороня́ть**, **обороня́ться** **2.** оборона, ҡурғау, ҡурғауыл; **крепи́ть оборо́ну страны́** илдең ҡурғауылын нығытыу; **кругова́я оборо́на** әйләнмәле оборона; **прорва́ть вра́жескую оборо́ну** дошмандың ҡурғауылын өҙөү; **ли́ния оборо́ны** ҡурғау (оборона) һыҙығы

**ОБОРО́НЕЦ** *м* (*сторонник оборончества*) ҡурғаусылыҡ яҡлы, ҡурғаусы

**ОБОРОНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һаҡланыу ...ы, ҡурғаулау ...ы, оборона ...ы; **оборони́тельные пози́ции** ҡурғаулау позициялары; **оборони́тельные бои́** ҡурғаулау һуғышы

**ОБОРО́ННЫЙ,** -ая, -ое ҡурғау ...ы, ҡурғауыллау ...ы, оборона ...ы; **оборо́нные предприя́тия** оборона предприятиелары; **оборо́нная мощь страны́** илдең оборона ҡеүәте

**ОБОРОНОСПОСО́БНОСТЬ** *ж* ҡурғауыллауға (һаҡланыуға, ҡурсалауға) һәләтлелек, оборона һәләте; **крепи́ть обороноспосо́бность страны́** илдең оборона һәләтен нығытыу

**ОБОРОНОСПОСО́БНЫЙ,** -ая, -ое ҡурғауыллауға (оборонаға) һәләтле; **обороноспосо́бное госуда́рство** үҙен-үҙе һаҡлауға һәләтле дәүләт

**ОБОРО́НЧЕСТВО** *с*; *полит.* ҡурғаусылыҡ (*1914—1918 йй. Беренсе донъя һуғышында "ватанды һаҡлау" лозунгыһы аҫтында буржуаз дәүләтте яҡлаған оппортунистик фирҡәләр сәйәсәте*)

**ОБОРОНЯ́ТЬ** *несов. кого-что* һаҡлау, ҡурғауыллау; **обороня́ть Оте́чество** Ватанды һаҡлау; **обороня́ть свобо́ду** иректе һаҡлау

**ОБОРОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** ҡурғаныу, һаҡланыу, ҡаршы тороу; **обороня́ться от врага́** дошманға ҡаршы тороу **2.** *страд. от* **обороня́ть**

**ОБОРО́Т** *м* **1.** *в разн. знач.* әйләнеш; **оборо́т колеса́** тәгәрмәс әйләнеше; **оборо́т ваго́нов** вагондар әйләнеше; **оборо́т полевы́х культу́р** баҫыу культуралары әйләнеше; **оборо́т капита́ла** капитал әйләнеше; **годово́й оборо́т** йыллыҡ әйләнеш **2.** ҡулланыш, ҡулланылыш; **ввести́ в оборо́т но́вое сло́во** ҡулланышҡа яңы һүҙ индереү **3.** бөгөл, бөгөм, боролма; **оборо́ты реки́**



½ 24 зак. 2.0084.05

йылға бөгөлдәре; **ле́стница с двумя́ оборо́тами** ике бөгөмлө баҫҡыс; **оборо́т пе́чи** мейестең бөгөмө **4.** йүнәлеш, төҫ; **приня́ть нежела́тельный оборо́т** теләмәгән йүнәлеш алыу **5.** икенсе (артҡы, теге) яҡ; **сде́лать на́дпись на оборо́те** икенсе яғына яҙып ҡуйыу **6.** (*словесное выражение*) әйтелеш, әйтем; **прича́стный оборо́т** *грам.* сифат ҡылым әйтеме; **газе́тные оборо́ты ре́чи** телмәрҙең гәзиткә хас әйтелештәре ♦ **брать (взять) в оборо́т** буйһондороп эшләтеү, эшләргә мәжбүр итеү

**О́БОРОТЕНЬ** *м*; *фольк.* әүермән, шайтан, ен, албаҫты

**ОБОРО́ТИСТОСТЬ** *ж*; *разг. см.* **оборо́тливость**

**ОБОРО́ТИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **оборо́тливый**

**ОБОРО́ТЛИВОСТЬ** *ж*; *разг.* етеҙлек, өлгөрлөк, сослоҡ, осҡорлоҡ; **прояви́ть оборо́тливость** өлгөрлөк күрһәтеү

**ОБОРО́ТЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* етеҙ, өлгөр, сос, осҡор; **оборо́тливый предпринима́тель** өлгөр эшҡыуар

**ОБОРО́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** әйләнештәге; **оборо́тные сре́дства** әйләнештәге аҡсалар **2.** икенсе (артҡы, тиҫкәре, кире) яҡ; **оборо́тная сторона́ листа́** биттең икенсе яғы; **оборо́тная сторона́ тка́ни** туҡыманың тиҫкәре яғы ♦ **оборо́тная сторона́** *чего-л. берәй нәмәнең* икенсе (кире, насар) яғы (ҡылығы, сифаты); **оборо́тная сторона́ меда́ли** эштең кире (насар) яғы

**ОБОРУ́ДОВАНИЕ** *с* **1.** *см.* **обору́довать 2.** йыһаз, ҡорамал; **получи́ть но́вое обору́дование** яңы ҡорамал алыу; **бурово́е обору́дование** ер быраулау ҡорамалдары

**ОБОРУ́ДОВАТЬ** *сов., несов. что* йыһазлау, йыһазландырыу, ҡорамалдар ҡуйыу; **обору́довать мастерску́ю** оҫтахана йыһазландырыу; **обору́довать площа́дку для игр** уйын майҙансығын йыһазландырыу

**ОБОСА́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **обосо́бить**

**ОБОСА́БЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обосо́биться 2.** *страд. от* **обоса́бливать**

**ОБОСНОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обоснова́ть**; **обоснова́ние свои́х взгля́дов** үҙ ҡараштарыңды дәлилләү **2.** (*основание*) нигеҙ, дәлил; **нау́чные обоснова́ния** ғилми нигеҙҙәр

**ОБОСНО́ВАННОСТЬ** *ж* нигеҙле (дәлилле) булыу, нигеҙлелек; **обосно́ванность реше́ния** ҡарарҙың нигеҙлелеге

**ОБОСНО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обоснова́ть 2.** *прил.* нигеҙле; **обосно́ванное заключе́ние** нигеҙле һығымта; **обосно́ванное тре́бование** нигеҙле талап

**ОБОСНОВА́ТЬ** *сов. что* нигеҙләү, дәлилләү, дәлил килтереү; **обоснова́ть свою́ пози́цию** үҙ ҡарашыңды нигеҙләү

**ОБОСНОВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* нигеҙләнеү, төпләнеү, урынлашыу; **обоснова́ться в дере́вне** ауылда төпләнеү

**ОБОСНО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **обоснова́ть**

**ОБОСНО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обоснова́ться 2.** *страд. от* **обосно́вывать**

**ОБОСО́БИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* айырыу, айырып ҡуйыу (алыу), бүлеп ҡуйыу; **обосо́бить уча́сток** участканы айырып ҡуйыу **2.** *что*; *грам.* айырыу; **обосо́бить приложе́ние** өҫтәлмәлекте (өтөр менән) айырыу

**ОБОСО́БИТЬСЯ** *сов.* **1.** айырылыу, айырылып (бүленеп) бөтөү; **хозя́йства обосо́бились друг от дру́га** хужалыҡтар бер-береһенән айырылды **2.** (*замкнуться в себе*) бикләнеү, бикләнеп (үҙ алдына, аралашмай) йәшәү **3.** *грам.* айырымланыу

**ОБОСОБЛЕ́НИЕ** *с см.* **обосо́бить, обосо́биться**

**ОБОСО́БЛЕННОСТЬ** *ж* айырымлыҡ, айырымланғанлыҡ, айырымланған булыу, бүленеү; **национа́льная обосо́бленность** милли айырымланғанлыҡ; **сосло́вная обосо́бленность** ҡатламдарға бүленгәнлек

**ОБОСО́БЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обосо́бить 2.** *прил.* айырым, үҙенә башҡа (айырым); **обосо́бленное поселе́ние** айырым ултырған ауыл; **обосо́бленная ко́мната** айырым бүлмә **3.** *прил.*; *грам.* айырымланған; **обосо́бленные чле́ны предложе́ния** һөйләмдең айырымланған киҫәктәре

**ОБОСОБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **обосо́бить**

**ОБОСОБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обосо́биться 2.** *страд. от* **обособля́ть**

**ОБОСТРЕ́НИЕ** *с см.* **обостри́ть, обостри́ться**; **обостре́ние боле́зни** сирҙең көсәйеүе (аҙыуы); **обостре́ние положе́ния** хәлдең киҫкенләшеүе

**ОБОСТРЁННОСТЬ** *ж* **1.** үткерлек, һиҙгерлек, көсәйгәнлек, ташып тороу, артыҡ үткер (һиҙгер, көсәйгән) булыу; **обострённость слу́ха** ишетеү һәләтенең үткерлеге (*яҡшы ишетеү*); **обострённость чувств** тойғо-хистәрҙең ташып тороуы **2.** ҡырҡыулашыу, киҫкенләшеү, ҡырҡыу (киҫкен) булыу; **обострённость отноше́ний** мөнәсәбәттәрҙең киҫкенлеге

**ОБОСТРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обостри́ть 2.** *прил.* (*о чертах лица*) ослайған, ослайып сығып торған; **обострённые ску́лы** ослайып сығып торған яңаҡ **3.** *прил.* һиҙгер; **обострённый слух** һиҙгер ҡолаҡ **4.** *прил.* ҡырҡыу, киҫкенләшкән; **обострённые отноше́ния** ҡырҡыу мөнәсәбәттәр

**ОБОСТРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** көсәйтеү, һиҙгерләтеү, үткерләндереү, һиҙгерләндереү; **обостри́ть жела́ние** теләкте көсәйтеү; **обостри́ть зре́ние** күреү һәләтен үткерләндереү; **обостри́ть боль** ауыртыуҙы көсәйтеү **2.** киҫкенләштереү,

ҡырҡыулаштырыу; **обостри́ть обстано́вку** хәлде киҫкенләштереү

**ОБОСТРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о чертах лица*) ослайыу, һурылыу, һурылып (тартылып) китеү; **черты́ лица́ обостри́лись** йөҙө һурылған **2.** (*о чувстве, ощущении и т.п.*) көсәйеү, яҡшырыу, үткерләнеү, һиҙгерләнеү; **слух обостри́лся** ишетеү һәләте яҡшырҙы **3.** (*о болезни*) көсәйеү (аҙыу); **проце́сс в лёгких обостри́лся** үпкәләге ауырыу көсәйҙе **4.** киҫкенләшеү, ҡырҡыулашыу; **отноше́ния обостри́лись** мөнәсәбәттәр киҫкенләште

**ОБОСТРЯ́ТЬ** *несов. см.* **обостри́ть**

**ОБОСТРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обостри́ться 2.** *страд. от* **обостря́ть**

**ОБО́ЧИНА** *ж* сит, ҡыр; **е́хать обо́чиной доро́ги** юл ситенән барыу

**ОБОЮ́ДНЫЙ,** -ая, -ое ике яҡлап булған, үҙ-ара, ике яҡ өсөн дә уртаҡ; **обою́дное жела́ние** ике яҡ өсөн дә уртаҡ теләк; **обою́дное согла́сие** үҙ-ара килешеү

**ОБОЮДО...** *урыҫ телендә ҡайһы бер ҡушма сифаттарҙың "ике яғы ла", "ике яҡтан да", "ике яҡ өсөн дә" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **обоюдовы́годный** ике яҡ өсөн дә файҙалы

**ОБОЮДОО́СТРЫЙ,** -ая, -ое ике яғы ла үткер; **обоюдоо́стрый кинжа́л** ике яғы ла үткер хәнйәр

**ОБРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **обрабо́тать**

**ОБРАБА́ТЫВАЮЩИЙ,** -ая, -ее *прич. от* **обраба́тывать** ♦ **обраба́тывающая промы́шленность** эшкәртеүсе сәнәғәт

**ОБРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* эшкәртеү, эшкә индереү; (*о коже*) иләү; **обрабо́тать зе́млю** ерҙе эшкәртеү; **обрабо́тать ко́жу** тире иләү; **обрабо́тать па́ром** пар менән эшкәртеү; **обрабо́тать ра́ну йо́дом** яраны йод менән эшкәртеү **2.** *кого-что*; *перен.*, *прост.* (*склонить к чему-л.*) үҙ яғына ауҙарыу, йоғонто яһау, тәьҫир итеү; **обрабо́тать свиде́теля в свою́ по́льзу** шаһитты үҙ яғыңа ауҙарыу

**ОБРАБО́ТКА** *ж см.* **обрабо́тать**; **обрабо́тка ка́мня** ташты эшкәртеү; **обрабо́тка дета́ли** деталде эшкәртеү; **обрабо́тка о́черка** очеркты эшкәртеү

**ОБРА́ДОВАТЬ** *сов. кого-что* шатландырыу, һөйөндөрөү, ҡыуандырыу, кинәндереү; **обра́довать хоро́шим изве́стием** яҡшы хәбәр менән шатландырыу

**ОБРА́ДОВАТЬСЯ** *сов.* шатланыу, һөйөнөү, ҡыуаныу, кинәнеү; **обра́доваться встре́че** осрашыуға ҡыуаныу; **обра́доваться пода́рку** бүләккә шатланыу

**О́БРАЗ I** *м* **1.** (*внешний вид, облик*) ҡиәфәт, сүрәт; **измени́ть свой о́браз** ҡиәфәтте үҙгәртеү; **приня́ть о́браз** *чей-л. берәйһенең* сүрәтенә инеү **2.** *обычно мн.* **о́бразы** (*воображаемое представление о ком-чём-л.*) күренеш, һын; **све́тлые о́бразы бу́дущего** киләсәктең яҡты күренештәре **3.** *филос.* һүрәт; **мы́сленные о́бразы вне́шнего ми́ра** тышҡы донъяның уйҙағы һүрәттәре **4.** *лит.*, *иск.* образ; **поэ́т мы́слит о́бразами** шағир образдар менән фекерләй; **о́браз Хади́й** Һәҙиә образы **5.** *чего* рәүеш; **о́браз жи́зни** йәшәү рәүеше; **о́браз мы́слей** фекер йөрөтөү рәүеше ♦ **гла́вным о́бразом** күбеһенсә, башлыса; **нико́им о́бразом** бер нисек тә, бер хәлдә лә; **надлежа́щим о́бразом** тейешле рәүештә; **таки́м о́бразом** шулай итеп, шул рәүештә; **ра́вным о́бразом** шулай уҡ; **реши́тельным о́бразом** ҡырҡа рәүештә; **не́которым о́бразом** ҡайһы бер (ниндәйҙер) рәүештә; **поэти́ческий о́браз** поэтик сара; **утра́тить (потеря́ть) челове́ческий о́браз** кешелек сифатын юғалтыу

**О́БРАЗ II** *м* (*мн.* **образа́**) тәре

**ОБРАЗЕ́Ц** *м* **1.** *чего* и *без доп.* өлгө, үрнәк; **образе́ц рису́нка** һүрәт өлгөһө; **образцы́ го́рных поро́д** тау тоҡомо үрнәктәре **2.** *чего* үрнәк; **служи́ть образцо́м нра́вственности** әхлаҡлылыҡ үрнәге булып тороу; **образе́ц му́жества** батырлыҡ үрнәге; **быть образцо́м** үрнәк булыу **3.** төр, төҙөлөш; **тка́ни но́вых образцо́в** яңы төр туҡымалар; **дом стари́нного образца́** иҫке төҙөлөшлө өй

**ОБРАЗИ́НА** *ж*; *прост.* ҡотһоҙ, йәмһеҙ, ямаҡ йөҙ, шөкәтһеҙ

**О́БРАЗНОСТЬ** *ж* образлылыҡ, тасуирлылыҡ; **о́бразность ре́чи** телмәр(ҙең) образлылығы

**О́БРАЗНЫЙ,** -ая, -ое образлы; **о́бразное мышле́ние** образлы фекерләү; **о́бразное позна́ние ми́ра** донъяны образлы таныу; **о́бразное выраже́ние** образлы әйтем

**ОБРАЗОВА́НИЕ I** *с* **1.** *см.* **образова́ть** 1, **образова́ться**; **образова́ние госуда́рства** дәүләтте ойоштороу; **образова́ние водяны́х паро́в** һыу быуының барлыҡҡа килеүе **2.** ҡатлам; **го́рные образова́ния** тау ҡатламдары; **жировы́е образова́ния** (тире аҫтындағы) май ҡатламдары

**ОБРАЗОВА́НИЕ II** *с* **1.** (*обучение*) уҡыу-уҡытыу, белем, мәғариф; **наро́дное образова́ние** халыҡ мәғарифы; **пра́во на образова́ние** белем алыуға хоҡуҡ; **вопро́сы образова́ния** уҡыу-уҡытыу мәсьәләләре **2.** (*совокупность знаний, полученных в результате обучения*) белем; **вы́сшее образова́ние** юғары белем; **специа́льное образова́ние** махсус белем; **получи́ть техни́ческое образова́ние** техник белем алыу

**ОБРАЗО́ВАННОСТЬ** *ж* уҡымышлылыҡ, белемлелек, белем дәрәжәһе; **оцени́ть образо́ванность** *чью-л. берәйһенең* уҡымышлылығына баһа биреү

**ОБРАЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **образова́ть** 2; **2.** *прил.* уҡыған, уҡымышлы, белемле; **образо́ванный челове́к** уҡымышлы кеше; **образо́ванное о́бщество** белемле йәмғиәт

**ОБРАЗОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое белем биреү (арттырыу) ...ы, белем ...ы, уҡымышлылыҡ ...ы; **постано́вка образова́тельного де́ла** белем биреү эшенең ҡуйылышы; **образова́тельные экску́рсии** белем арттырыу экскурсиялары; **образова́тельный у́ровень** уҡымышлылыҡ дәрәжәһе ♦ **образова́тельный ценз** белем цензы

**ОБРАЗОВА́ТЬ I** *сов., несов. что* **1.** (*создать, составить*) тәшкил (хасил) итеү, барлыҡҡа килтереү; **две кни́ги рома́на образу́ют дило́гию** романдың ике китабы дилогияны тәшкил итә; **доро́га образу́ет полукру́г** юл ярым түңәрәк яһай **2.** (*основать*) ойоштороу, төҙөү, булдырыу; **образова́ть коми́ссию** комиссия ойоштороу

**ОБРАЗОВА́ТЬ II** *сов., несов.; уст.* **1.** (*просветить*) белемгә эйә булыу, уҡытыу **2.** (*усовершенствовать, выработать*) камиллаштырыу, яйға һалыу; **образова́л свою́ речь** үҙемдең телмәремде камиллаштырҙым

**ОБРАЗОВА́ТЬСЯ** *сов., несов.* **1.** (*получиться, возникнуть*) барлыҡҡа килеү, хасил булыу; **от взры́ва образова́лась воро́нка** шартлауҙан соҡор барлыҡҡа килгән **2.** (*организоваться*) ойошоу, ойошторолоу, төҙөлөү; **образу́ется но́вый кружо́к** яңы түңәрәк ойошторола **3.** *разг.* (*уладиться*) яйланыу, рәтләнеү, яйға (рәткә) һалыныу; **не беспоко́йтесь, всё образу́ется** борсолмағыҙ, бөтәһе лә яйланыр

**ОБРАЗО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **образова́ть**

**ОБРАЗО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **образова́ться 2.** *страд. от* **образо́вывать**

**ОБРАЗУ́МИТЬ** *сов. кого-что* аҡылға ултыртыу (индереү, керетеү); **образу́мить собесе́дника** әңгәмәсене аҡылға ултыртыу

**ОБРАЗУ́МИТЬСЯ** *сов.* аҡылланыу, аҡыл инеү (кереү), аҡылға ултырыу; **с во́зрастом образу́мился** олоғая бара аҡылға ултырҙы

**ОБРАЗЦО́ВО-ПОКАЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое үрнәк булырлыҡ (алырлыҡ), үрнәк булған (булып торған); **образцо́во-показа́тельная шко́ла** үрнәк булып торған мәктәп

**ОБРАЗЦО́ВЫЙ,** -ая, -ое үрнәк, үрнәк булырлыҡ (алырлыҡ); **образцо́вый уро́к** үрнәк дәрес; **образцо́вый поря́док** үрнәк булырлыҡ тәртип; **образцо́вые хозя́йства** үрнәк алырлыҡ хужалыҡтар

**ОБРА́ЗЧИК** *м* үрнәк, өлгө; **обра́зчик тка́ни** туҡыма өлгөһө

**ОБРА́МИТЬ** *сов. что; разг.* ҡыҫанлау, рамлау, ҡыҫанға (рамға) ҡуйыу; **обра́мить карти́ну** картинаны ҡыҫанға ҡуйыу

**ОБРАМЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обра́мить 2.** (*рамка, окружение*) рам, ҡыҫан, ҡайма, тирәс, уратып алыу, солғаныу; **литерату́рное обрамле́ние** әҙәби солғаныу; **обрамле́ние гравю́ры** гравюраның ҡыҫаны (рамы); **обрамле́ние зе́ркала** көҙгөнөң ҡыҫаны (рамы)

**ОБРАМЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **обра́мить 2.** *что* (*окружать, окаймлять*) уратыу, ҡаймалау, уратып (тирәләп) тороу; **ви́шни обрамля́ют сад** сейә ағастары баҡсаны уратып тора

**ОБРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **обрасти́**

**ОБРАСТИ́** *сов.* **1.** *чем* и *без доп.* баҫыу, етеү, ҡаплау, үҫеп ҡаплау (ҡапланыу); **обрасти́ ли́пой** йүкә ҡаплау; **обрасти́ мо́хом** мүк баҫыу, мүк менән ҡапланыу; **обрасти́ волоса́ми** сәс етеү **2.** *чем; перен., разг.* уратып алыныу, барлыҡҡа килеү; **го́род обро́с посёлками** ҡала тирәһендә ҡасабалар барлыҡҡа килде **3.** *чем; перен., разг.* булдырыу, ойоштороу; **обрасти́ хозя́йством** хужалыҡты ойоштороу; **обрасти́ знако́мствами** таныш-белештәр булдырыу

**ОБРА́Т** *м; спец.* айыртҡан һөт

**ОБРАТИ́МОСТЬ** *ж; спец.* ҡайтмалылыҡ, элекке хәлгә ҡайтыу һәләте; **обрати́мость хими́ческих реа́кций** химик реакцияларҙың ҡайтмалылығы

**ОБРАТИ́МЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ҡайтмалы, кире ҡайтыусан, элекке хәленә кире ҡайтыусан; **обрати́мые измене́ния** кирегә ҡайтмалы үҙгәрештәр; **обрати́мые реа́кции** ҡайтмалы реакциялар

**ОБРАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что; прям., перен.* (*повернуть, направить, устремить*) төбәү, бороу, йүнәлтеү, йүнәлдереү; **обрати́ть глаза́ на сце́ну** күҙҙе сәхнәгә төбәү; **обрати́ть лицо́** *к кому-л.* *берәйһенә* йөҙҙө бороу; **обрати́ть ору́жие про́тив неприя́теля** ҡоралды дошманға ҡаршы йүнәлтеү; **обрати́ть разгово́р к друго́му предме́ту** һөйләшеүҙе икенсе нәмәгә бороу **2.** *кого-что; книжн.* күндереү, баҫтырыу; **обрати́ть на пра́вильный путь** дөрөҫ юлға баҫтырыу; **обрати́ть в мусульма́нскую ве́ру** мосолман диненә күндереү **3.** *кого-что, во что* (*изменить, превратить*) әүерелдереү, әйләндереү; **обрати́ть во́ду в пар** һыуҙы быуға әйләндереү; **обрати́ть де́ло в шу́тку** эште көлкөгә әйләндереү; **обрати́ть дом в музе́й** өйҙө музейға әүерелдереү **4.** (*обменять*) ҡулланыу, тотоу, әйләндереү; **обрати́ть всё в капита́л** бөтәһен дә капиталға әйләндереү; **обрати́ть де́ньги в ве́щи** аҡсаны әйбергә әйләндереү ♦ **обрати́ть в бе́гство** ҡасырға мәжбүр итеү; **обрати́ть на путь и́стины (на и́стинный путь)** *см.* **путь; обрати́ть в свою́ ве́ру** *кого* үҙ ҡараштарыңа күндереү

**ОБРАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*повернуться*) боролоу, әйләнеү, төбәлеү; **обрати́ться лицо́м к окну́** йөҙ менән тәҙрәгә боролоу; **все взо́ры обрати́лись на неё** барлыҡ ҡараштар уға төбәлде **2.** *перен.* эш-мәсьәләгә төбәлеү, йүнәлеү; **мы́сли его́ обрати́лись к про́шлому** уның уйҙары үткәндәргә йүнәлде **3.** *к чему-л.* (*взяться за что-л., перейти к чему-л.*) тотоноу, керешеү, шөғөлләнә башлау; **обрати́ться к нау́ке** фән менән шөғөлләнә башлау; **обрати́ться к кни́гам** китап

уҡырға тотоноу **4.** *к кому-чему-л.* барыу, мөрәжәғәт итеү, һүҙ ҡушыу, өндәшеү, бағыу; **обрати́ться к врачу́** табипҡа барыу; **обрати́ться с воззва́нием** саҡырыу менән мөрәжәғәт итеү **5.** *в кого-что, кем-чем* әйләнеү, әүерелеү; **жи́дкость обрати́лась в газ** шыйыҡса газға әүерелде **6.** (*полностью отдаться какому-л. чувству, состоянию*) -й башлау, -ға/-гә бирелеү, булып -ыу/-еү; **обрати́ться в слух** бөтә иғтибар менән тыңлай башлау ♦ **обрати́ться в бе́гство** ҡасырға мәжбүр булыу

**ОБРА́ТНО** *нареч.* **1.** кире, кирегә; **поверну́ть обра́тно** кире боролоу; **получи́ть де́ньги обра́тно** аҡсаны кире алыу **2.** *разг.* (*наоборот*) киреһенсә

**ОБРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кире, кире ҡайта торған; **в обра́тном направле́нии** кире йүнәлештә; **обра́тный по́езд** кире ҡайта торған поезд; **обра́тный путь** кире ҡайта торған юл; **обра́тный проце́сс** кире процесс **2.** кире, ҡапма-ҡаршы; **в обра́тном поря́дке** кире тәртиптә; **обра́тный смысл** ҡапма-ҡаршы мәғәнә **3.** тиҫкәре, икенсе, артҡы, кире; **обра́тная сторона́ моне́ты** аҡсаның кире яғы; **обра́тная сторона́ мате́рии** туҡыманың тиҫкәре яғы **4.** *мат.* кире; **обра́тная дробь** кире кәсер ♦ **обра́тный а́дрес** кире адрес; **обра́тный биле́т** кире ҡайтыу билеты; **обра́тная си́ла зако́на** *юр.* закондың кире көсө (*закондың үҙе сығыуынан элек булған эштәргә ҡарата ҡулланылыуы*); **обра́тный слова́рь** кире һүҙлек (*һүҙҙәрҙең урыны уларҙың һуңғы хәрефтәренең алфавит тәртибенә нигеҙләнгән һүҙлек*)

**ОБРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **обрати́ть**

**ОБРАЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обрати́ться** **2.** (*вращаться*) йөрөү, әйләнеү; **Земля́ обраща́ется вокру́г Со́лнца** Ер Ҡояш тирәләй әйләнә **3.** *эк.* әйләнеү, әйләнештә булыу, әйләнеш яһау; **капита́л обраща́ется ме́дленно** капитал әкрен әйләнә; **на би́рже ежеме́сячно обраща́ется милли́он рубле́й** ай һайын биржала миллион һум әйләнеш яһала **4.** *с кем* (*поступать каким-л. образом*) мөғәмәлә итеү, булыу; **хорошо́ обраща́ться с подчинёнными** ҡул аҫтында эшләүселәргә яҡшы булыу; **уважи́тельно обраща́ться друг с дру́гом** бер-береңә ихтирам менән мөғәмәлә итеү **5.** *с чем* эш итеү, ҡулланыу; **уме́ть обраща́ться с ору́жием** ҡорал ҡуллана белеү; **осторо́жно обраща́ться с прибо́рами** приборҙар менән һаҡ эш итеү **6.** *страд. от* **обраща́ть**

**ОБРАЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обрати́ть, обрати́ться**; **обраще́ние плане́т** планеталарҙың әйләнеүе; **обраще́ние просты́х дробе́й в десяти́чные** ябай кәсерҙе унарлы кәсерҙәргә әйләндереү **2.** (*обхождение*) мөғәмәлә, хәл итеү; **мя́гкое обраще́ние с ребёнком** бала менән йомшаҡ мөғәмәлә итеү; **изы́сканность обраще́ния** мөғәмәләнең нәзәкәтлеге **3.** (*призыв, просьба*) саҡырыу, мөрәжәғәт; **обраще́ние к наро́ду** халыҡҡа мөрәжәғәт; **приня́ть обраще́ние** мөрәжәғәт ҡабул итеү; **посла́ть обраще́ние** мөрәжәғәт ебәреү **4.** *грам.* өндәш һүҙ; **вы́делить обраще́ние запяты́ми** өндәш һүҙҙе өтөрҙәр менән айырыу **5.** (*употребление*) ҡулланыу, ҡулланыш; **пусти́ть в обраще́ние** ҡулланыуға индереү; **изъя́ть из обраще́ния** ҡулланыштан сығарыу; **находи́ться в обраще́нии** ҡулланышта булыу **6.** *эк.* әйләнеш; **това́рное обраще́ние** тауар әйләнеше **7.** *лог.* (*вид умозаключения*) әйләндереү

**ОБРЕ́З** *м* **1.** (*обрезанный край, кромка*) ҡыр, сит, киҫем, киҫелгән урын; **кни́га с золоты́м обре́зом** алтын ситле китап **2.** (*оружие*) обрез (*көбәге киҫелгән мылтыҡ*) ♦ **в обре́з** саҡ-саҡ ҡына, етер-етмәҫ кенә

**ОБРЕ́ЗАНИЕ** и **ОБРЕЗА́НИЕ** *с*; *рел.* сөннәтләү, сөннәткә ултыртыу (биреү)

**ОБРЕЗА́НИЕ** *с см.* **обре́зать** 1; **обреза́ние дере́вьев** ағас ботаҡтарын киҫеү

**ОБРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что* ҡыҫҡартыу, киҫеү, киҫеп алыу (ҡыҫҡартыу, ташлау), мөнтәү; **обре́зать во́лосы** сәсте киҫеп ҡыҫҡартыу; **обре́зать верёвку** бауҙы киҫеү; **обре́зать ко́рочку хле́ба** икмәктең ҡыйырын киҫеп алыу **2.** *что* (*поранить*) киҫеү, ҡырҡыу, киҫеп яралау; **обре́зать па́лец** бармаҡты киҫеү **3.** *кого-что*; *перен., разг.* ҡырт киҫеү (туҡтатыу, бүлеү); **обре́зать на пе́рвом сло́ве** беренсе һүҙҙән үк ҡырт киҫеү, бер һүҙҙән туҡтатыу **4.** *кого-что*; *рел.* сөннәтләү, сөннәткә ултыртыу (биреү) ♦ **обре́зать кры́лья** *кому* ҡанатын ҡырҡыу (һындырыу)

**ОБРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **обре́зать**

**ОБРЕ́ЗАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* киҫелеү, ҡырҡылыу, киҫеп яраланыу; **обре́заться ножо́м** бысаҡҡа киҫелеү

**ОБРЕЗА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обре́заться** **2.** *страд. от* **обреза́ть**

**ОБРЕ́ЗКА** *ж см.* **обре́зать** — **обреза́ть**

**ОБРЕЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** ҡыры (ситe) киҫелгән; **обрезно́й тёс** ҡыры киҫелгән таҡта **2.** киҫеү ...ы, ҡыҫҡартыу ...ы; **обрезно́й стано́к** киҫеү станогы

**ОБРЕ́ЗОК** *м* киҫенте, ҡырҡынты; **обре́зки ко́жи** тире киҫентеләре

**ОБРЕКА́ТЬ** *несов. см.* **обре́чь**

**ОБРЕМЕНИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* мәшәҡәтлелек, мәшәҡәтле булыу; **обремени́тельность поруче́ния** йомоштоң мәшәҡәтле булыуы

**ОБРЕМЕНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ауыр, мәшәҡәтле; **обремени́тельные обя́занности** мәшәҡәтле вазифалар; **счита́ть обремени́тельным** мәшәҡәтле һанау

**ОБРЕМЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что, чем* ҡамасаулау, борсоу, мәшәҡәтләү, мәшәҡәтләндереү, имгәк булыу; **обремени́ть про́сьбой** үтенес менән борсоу; **обремени́ть непоси́льным трудо́м** ауыр эш ҡушып ҡамасаулау

**ОБРЕМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **обремени́ть**

**ОБРЕСТИ́** *сов. кого-что*; *книжн.* табыу, ирешеү; **обрести́ сча́стье** бәхеткә ирешеү; **обрести́ друзе́й** дуҫтар табыу; **обрести́ душе́вный поко́й** күңел тыныслығы табыу

**ОБРЕТА́ТЬ** *несов. см.* **обрести́**

**ОБРЕЧЁННОСТЬ** *ж* һәләкәткә дусар булғанлыҡ (ителгәнлек), һәләкәткә (бөтөүгә) дусар булыу; **чу́вство обречённости** һәләкәткә дусар булыу тойғоһо

**ОБРЕЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обре́чь 2.** *прил.* һәләкәткә (бөтөүгә) дусар булған (ителгән); **спасти́ обречённого челове́ка** һәләкәткә дусар булған кешене ҡотҡарыу

**ОБРЕ́ЧЬ** *сов. кого-что, на что*; *книжн.* дусар итеү; **обре́чь себя́ на одино́чество** үҙенде яңғыҙлыҡҡа дусар итеү

**ОБРИВА́ТЬ** *несов. см.* **обри́ть**

**ОБРИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обри́ться 2.** *страд. от* **обрива́ть**

**ОБРИСОВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тирәләй һыҙып сығыу; **обрисова́ть ко́нтур черни́лами** контурҙы ҡара менән тирәләй һыҙып сығыу **2.** *кого-что*; *перен.* һүрәтләү, тасуирлау, һөйләп (әйтеп) биреү; **обрисова́ть красо́ты приро́ды** тәбиғәттең хозурлығын тасуирлау; **обрисова́ть в двух слова́х** бер-ике һүҙ менән һөйләп биреү

**ОБРИСОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (асыҡ) күренә (беленә) башлау, күренеү; **в темноте́ обрисова́лась фигу́ра де́вушки** ҡараңғыла ҡыҙ һыны күренде **2.** *перен.* (*стать ясным, выявиться*) асыҡланыу, мәғлүм булыу, беленеү; **ситуа́ция обрисова́лась** ситуация асыҡланды; **зада́чи пое́здки вско́ре обрисова́лись** барыу маҡсаты тиҙҙән мәғлүм булды

**ОБРИСО́ВКА** *ж см.* **обрисова́ть**, **обрисова́ться**

**ОБРИСО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **обрисова́ть**

**ОБРИСО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обрисова́ться 2.** *страд. от* **обрисо́вывать**

**ОБРИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡырыу, ҡырып алыу (ташлау); **обри́ть бо́роду** һаҡалды ҡырып ташлау; **обри́ть го́лову** сәсте ҡырыу

**ОБРИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡырыныу, ҡырынып алыу

**ОБРО́К** *м*; *ист.* оброк (*крепостнойлыҡ ваҡытында крәҫтиәндәрҙән алпауыттар алған һалым*)

**ОБРОНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*; *разг.* төшөрөп ҡалдырыу (юғалтыу), төшөрөп ебәреү; **оброни́ть паке́т** пакетты төшөрөп ҡалдырыу; **оброни́ть на ковёр** келәмгә төшөрөп ебәреү **2.** (*листву*) ҡойоу; **оброни́ть листву́** япраҡ ҡойоу **3.** *что* и *без доп.* ысҡындырыу, әйтеп ҡуйыу (һалыу); **оброни́ть сло́во** һүҙ әйтеп һалыу; **он оброни́л, что не придёт** ул килмәйем тип ысҡындырҙы

**ОБРО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *ист.* **1.** оброк ...ы; **обро́чные де́ньги** оброк аҡсалары **2.** оброк түләүсе; **обро́чные крестья́не** оброк түләүсе крәҫтиәндәр

**ОБРУБА́ТЬ** *несов. см.* **обруби́ть**

**ОБРУБИ́ТЬ** *сов. что* **1.** сабып (киҫеп) ҡыҫҡартыу, киҫеп алыу (ташлау); **обруби́ть жердь** кәртәне сабып ҡыҫҡартыу; **обруби́ть су́чья** ботаҡтарҙы киҫеп ташлау **2.** ситен бөгөү; **обруби́ть платки́** яулыҡ ситен бөгөү

**ОБРУ́БОК** *м* **1.** (*бревна, дерева и т.п.*) түмәр, бүкән; **обру́бок ду́ба** имән түмәре **2.** ҡырҡынды, киҫенде; **обру́бок хвоста́** ҡойроҡ киҫендеһе

**ОБРУГА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* (*обозвать, выругать*) һүгеү, орошоу, әрләү, тиргәү, һүгеп (әрләп, тиргәп) ташлау **2.** *кого-что*; *разг.* яманлау, тетеп һалыу; **обруга́ть статью́** мәҡәләне яманлау

**ОБРУСЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое урыҫлашҡан

**ОБРУСЕ́НИЕ** *с см.* **обрусе́ть**

**ОБРУСЕ́ТЬ** *сов.* урыҫлашыу

**О́БРУЧ** *м* ҡоршау

**ОБРУЧА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое никах ...ы; **обруча́льное кольцо́** никах балдағы

**ОБРУЧА́ТЬ** *несов. см.* **обручи́ть**

**ОБРУЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **обручи́ться**

**ОБРУЧЕ́НИЕ** *с* никахлау (*кейәү менән кәләш бармағына балдаҡ кейҙереү*)

**ОБРУЧИ́ТЬ** *сов.* никахлау, никах уҡыу

**ОБРУЧИ́ТЬСЯ** *сов.* никахлашыу

**ОБРУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **обру́шить**

**ОБРУ́ШИВАТЬСЯ** *несов. см.* **обру́шиться**

**ОБРУ́ШИТЬ** *сов. что* **1.** емереп (ишелдереп) төшөрөү; **обру́шить сте́ну** стенаны емереп төшөрөү **2.** *на кого-что*; *перен.* (*устремить на кого-что-л.*) яуҙырыу, ташлау; **обру́шить ого́нь на врага́** дошманға ут яуҙырыу; **обру́шить обвине́ния** ғәйеп ташлау (тағыу)

**ОБРУ́ШИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*рухнуть*) ишелеп (емерелеп) төшөү; **дом обру́шился** өй емерелеп төшкән **2.** (*устремиться*) ташланыу, ябырылыу; **во́лны обру́шились на бе́рег** тулҡындар ярға ташланды **3.** *перен.* (*неожиданно постичь кого-что-л.*) (башына, өҫтөнә) төшөү; **несча́стье обру́шилось внеза́пно** көтмәгәндә бәлә төштө **4.** *на кого-что*; *перен.* ташланыу, һөжүм итеү, ябырылыу; **обру́шиться на врага́** дошманға ташланыу

**ОБРЫ́В** *м* **1.** *см.* **оборва́ть** 2, **оборва́ться** 1; **2.** *спец.* өҙөк, өҙөк урын, өҙөлгән ер; **найти́ обры́в** өҙөлгән ерҙе табыу **3.** (*крутой откос*) текә яр, ярлау; **круто́й обры́в** текә яр; **подойти́ к обры́ву** ярлауға килеп баҫыу

**ОБРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **оборва́ть**

**ОБРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **обры́ть**

**ОБРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оборва́ться** 1—3; **2.** *страд. от* **обрыва́ть** I

**ОБРЫ́ВИСТЫЙ,** -ая, -ое **1.** ярлау, текә; **обры́вистый бе́рег** текә яр **2.** *перен.* өҙөк-өҙөк; **обры́вистая речь** өҙөк-өҙөк телмәр

**ОБРЫ́ВОК** *м* **1.** киҫәк; **обры́вок бума́ги** ҡағыҙ киҫәге; **обры́вок ле́нты** таҫма киҫәге **2.** *перен.* өҙөк; **обры́вки фра́зы** фраза өҙөктәре

**ОБРЫ́ЗГАТЬ** *сов. кого-что* сәсрәтеү, бөркөү, сәсрәтеп (бөркөп) бөтөрөү; **обры́згать пальто́ гря́зью** пальтоға бысраҡ сәсрәтеү; **обры́згать лицо́ водо́й** биткә һыу бөркөү

**ОБРЫ́ЗГАТЬСЯ** *сов.* өҫтөңә сәсрәтеү

**ОБРЫ́ЗГИВАТЬ** *несов. см.* **обры́згать**

**ОБРЫ́ЗГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обры́згаться 2.** *страд. от* **обры́згивать**

**ОБРЫ́СКАТЬ** *сов. что*; *разг.* гиҙеү, эҙләп (гиҙеп, йөрөп) сығыу; **обры́скать весь свет** бөтә донъяны гиҙеп сығыу

**ОБРЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*изрыть по краю*) тирәләй ҡаҙып (соҡоп) сығыу **2.** тирәләй ҡаҙып (йомшартып) сығыу; **обры́ть я́блоню** алмағас төбөн ҡаҙып сығыу

**ОБРЮ́ЗГЛЫЙ,** -ая, -ое шешенке, шешмәк; **обрю́згкое лицо́** шешенке бит

**ОБРЮ́ЗГНУТЬ** *сов.* бүртенеү, шешенеү, шешмәкләнеү, (тиреһе) һалынып төшөү

**ОБРЮ́ЗГШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **обрю́згнуть 2.** *прил. см.* **обрю́зглый**

**ОБРЯ́Д** *м* йола, ғөрөф, ғөрөф-ғәҙәт; **сва́дебный обря́д** туй йолаһы; **обря́д угоще́ния** ҡунаҡ күрһәтеү йолаһы

**ОБРЯ́ДОВЫЙ,** -ая, -ое йола ...ы, ғөрөф-ғәҙәт ...ы; **обря́довые пе́сни** йола йырҙары

**ОБСАДИ́ТЬ** *сов. что, чем* тирәләй ултыртыу (ултыртып сығыу); **обсади́ть пруд дере́вьями** быуа тирәһенә ағас ултыртыу

**ОБСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **обсади́ть**

**ОБСА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **обсоса́ть**

**ОБСА́ХАРИВАТЬ** *несов. см.* **обса́харить**

**ОБСА́ХАРИТЬ** *сов. что*; *разг.* шәкәрләү, шәкәр һибеү (һибеп сығыу), шәкәрләп ҡуйыу; **обса́харить мали́ну** ҡурай еләген шәкәрләп ҡуйыу

**ОБСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **обсе́чь**

**ОБСЕМЕНЕ́НИЕ** *с см.* **обсемени́ть** — **обсеменя́ть**

**ОБСЕМЕНИ́ТЬ** *сов. что*; *с.-х.* орлоҡ сәсеү; **обсемени́ть по́ле** ҡырға орлоҡ сәсеү

**ОБСЕМЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *бот.* орлоҡланыу, орлоҡ биреү

**ОБСЕМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **обсемени́ть**

**ОБСЕМЕНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обсемени́ться 2.** *страд. от* **обсеменя́ть**

**ОБСЕРВАТО́РИЯ** *ж* обсерватория

**ОБСЕ́СТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* тирәләй (уратып) ултырыу (ҡуныу); **обсе́сть го́стя круго́м** ҡунаҡты уратып ултырыу; **ста́я обсе́ла су́чья** ҡош тубы ботаҡтарҙы тирәләп ҡунған

**ОБСЕ́ЧЬ** *сов. что* **1.** (*отсекая, удалить*) киҫеп (ҡырҡып) төшөрөү, киҫеп (ҡырҡып, сабып) ташлау; **обсе́чь су́чья** ағас ботаҡтарын киҫеп төшөрөү **2.** *спец.* (*обтесать*) шымартыу, шымартып сығыу; **обсе́чь ка́мень** ташты шымартыу

**ОБСКАКА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.* (*проскакать вокруг*) саптырып әйләнеп сығыу; **обскака́ть ро́щу** ҡулҡыны саптырып әйләнеп сығыу; **обскака́ть полго́рода** ярты ҡаланы саптырып әйләнеп сығыу **2.** *кого* (*скача, обогнать*) саптырып уҙып китеү **3.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*опередить в чём-л.*) уҙып китеү, артта ҡалдырыу

**ОБСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **обскака́ть**

**ОБСКУРА́НТ** *м*; *книжн.* ҡәҙимсе, обскурант

**ОБСКУРАНТИ́ЗМ** *м*; *книжн.* ҡәҙимселек, обскурантлыҡ

**ОБСКУРАНТИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое *книжн.* ҡәҙимселек ...ы, обскурантлыҡ ...ы; **обскуранти́стские взгля́ды** ҡәҙимселек ҡараштары

**ОБСЛЕ́ДОВАНИЕ** *с см.* **обсле́довать**

**ОБСЛЕ́ДОВАТЕЛЬ** *м* тикшереүсе, тикшереү үткәреүсе

**ОБСЛЕ́ДОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* тикшереү, ҡарау, тикшереп (ҡарап) сығыу, тикшереү үткәреү; **обсле́довать де́ятельность** *чью-л.* берәйһенең эшмәкәрлеген тикшереү; **обсле́довать ме́стность** ерҙе тикшереп сығыу; **обсле́довать больно́го** ауырыуҙы ҡарау

**ОБСЛУ́ЖИВАНИЕ** *с см.* **обслу́живать**; **медици́нское обслу́живание** медицина ярҙамы күрһәтеү; **сфе́ра обслу́живания** хеҙмәт күрһәтеү өлкәһе

**ОБСЛУ́ЖИВАТЬ** *несов.* **1.** *кого-что* хеҙмәтләндереү; **обслу́живать покупа́телей** һатып алыусыларҙы хеҙмәтләндереү; **обслу́живать чита́телей** уҡыусыларҙы хеҙмәтләндереү **2.** *что* (*работать на чём-л.*) эшләү; **обслу́живать не́сколько станко́в** бер нисә станокта эшләү

**ОБСЛУ́ЖИВАЮЩИЙ,** -ая, -ее хеҙмәтләндереүсе, эшләүсе; **обслу́живающий персона́л** хеҙмәтләндереүсе кешеләр

**ОБСЛУЖИ́ТЬ** *сов. см.* **обслу́живать** 1

**ОБСЛЮНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* төкөрөкләү (шайыҡлау), төкөрөкләп (шайыҡлап) бөтөрөү

**ОБСОСА́ТЬ** *сов.* һурып бөтөрөү; **обсоса́ть конфе́ту** кәнфитте һурып бөтөрөү

**ОБСО́ХНУТЬ** *сов.* кибеү, ҡороу, кибеп (ҡороп) бөтөү; **оде́жда обсо́хла** кейем кибеп бөттө; **доро́ги обсо́хли** юлдар ҡороно

**ОБСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что, чем* (*окружить, поставить вокруг чего-л.*) тирәләй (тирәярына) ҡуйыу, тирәләй ҡуйып (теҙеп) сығыу **2.** *что* йыһазлау, йыһазландырыу; **обста́вить кварти́ру** фатирҙы мебель менән йыһазлау; **обста́вить кабине́т** кабинетты йыһазландырыу **3.** *что*; *перен.*, *разг.* ойоштороу; **обста́вить встре́чу как сле́дует** осрашыуҙы тейешле итеп ойоштороу **4.** *кого*; *прост.* (*обмануть*) төп башына ултыртыу, алдау, алдап китеү **5.** *кого*; *прост.* (*обогнать в чём-л.*) уҙып китеү, артта ҡалдырыу **6.** *кого*; *прост.* (*обыграть*) отоп сығыу (бөтөрөү)

**ОБСТА́ВИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*окружить себя чем-л.*) тирә-яҡҡа (ян-яҡҡа) теҙеп (өйөп) ҡуйыу, күмелеү; **обста́виться поду́шками** ян-

яҡҡа мендәрҙәр теҙеп ҡуйыу; **обста́виться кни́гами** китаптарға күмелеү 2. (*обзавестись мебелью*) мебель ҡуйыу, мебель менән йыһазлау; **обста́виться ме́белью** мебель ҡуйыу

**ОБСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **обста́вить**

**ОБСТАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* 1. *см.* **обста́виться**; 2. *страд. от* **обставля́ть**

**ОБСТАНО́ВКА** *ж* 1. мебель, йыһаз; **обстано́вка помеще́ния** бинаның йыһазы; **театра́льная обстано́вка** театрҙың йыһазы 2. хәл, шарт; **междунаро́дная обстано́вка** халыҡ-ара хәл; **в ми́рной обстано́вке** тыныс шарттарҙа

**ОБСТИРА́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* кер йыуып бөтөрөү (ҡуйыу, сығыу), керен йыуып биреү; **обстира́ть всех дете́й** барлыҡ балаларҙың кейемен йыуып ҡуйыу

**ОБСТИ́РЫВАТЬ** *несов. см.* **обстира́ть**

**ОБСТОЯ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* 1. (*детальность*) ентеклелек, тулылыҡ, ентекләп эшләгәнлек; **обстоя́тельность отчёта** иҫәп-хисаптың ентеклелеге 2. (*рассудительность*) төплөлөк, төплө булыу, уйлап эшләгәнлек; **обстоя́тельность рабо́ты** эштең төплө булыуы

**ОБСТОЯ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое 1. тулы, ентекле; **обстоя́тельный расска́з** тулы итеп һөйләү; **обстоя́тельная информа́ция** тулы мәғлүмәт; **стара́ться быть обстоя́тельным** бөтәһен дә (түкмәйсәсмәй) һөйләргә тырышыу 2. *разг.* (*рассудительный*) төплө, уйлап эш итә торған; **обстоя́тельный челове́к** төплө кеше

**ОБСТОЯ́ТЕЛЬСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое *грам.* хәл; **обстоя́тельственные слова́** хәл функцияһын үтәгән һүҙҙәр

**ОБСТОЯ́ТЕЛЬСТВО** *с* 1. ваҡиға, хәл, шарт, торош; **обстоя́тельства де́ла** эштең торошо; **осо́бенные обстоя́тельства** айырым шарттар 2. *мн.* **обстоя́тельства** шарт(тар), хәл(дәр), сәбәп(тәр); **в тру́дных обстоя́тельствах** ауыр шарттарҙа; **смотря́ по обстоя́тельствам** булған хәлдәргә ҡарап; **стече́ние обстоя́тельств** хәлдәрҙең бер-береһенә тура килеүе 3. *грам.* хәл; **обстоя́тельство вре́мени** ваҡыт хәле; **обстоя́тельство ме́ста** урын хәле

**ОБСТОЯ́ТЬ** *несов.* тороу, берәй хәлдә булыу, барыу; **как обстоя́т дела́** эштәр нисек бара; **всё обстои́т хорошо́** бөтәһе лә һәйбәт бара

**ОБСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **обстро́ить**

**ОБСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* 1. *см.* **обстро́иться** 2. *страд. от* **обстра́ивать**

**ОБСТРЕ́Л** *м* 1. (*стрельба по цели*) атыу; **артиллери́йский обстре́л** туптан атыу; **попа́сть под обстре́л** ут аҫтына эләгеү 2. *воен.* (*видимое пространство, которое обстреливается*) атыу (атыш) зонаһы, атыш барған ер, ут аҫты; **се́ктор обстре́ла** атыу секторы; **откры́ть обстре́л** ут асыу ♦ **брать (взять) под обстре́л** ҡаты тәнҡитләү

**ОБСТРЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **обстреля́ть**

**ОБСТРЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* 1. *см.* **обстреля́ться** 2. *страд. от* **обстре́ливать**

**ОБСТРЕ́ЛЯННЫЙ,** -ая, -ое 1. *прич. от* **обстреля́ть** 2. *прил.* (*побывавший в боях*) һуғышта (ут эсендә) булған; **обстре́лянный солда́т** һуғышта булған һалдат

**ОБСТРЕЛЯ́ТЬ** *сов. кого-что* атыу, ут асыу, утҡа (тупҡа) тотоу; **обстреля́ть с вертолёта** вертолёттан ут асыу; **обстреля́ть коло́нну** колоннаны тупҡа тотоу

**ОБСТРЕЛЯ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һуғышҡа күнегеү, һуғыш шарттарында күнегеү

**ОБСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **обстри́чь**

**ОБСТРИГА́ТЬСЯ** *несов.* 1. *см.* **обстри́чься** 2. *страд. от* **обстрига́ть**

**ОБСТРИ́ЧЬ** *сов. см.* **остри́чь**

**ОБСТРИ́ЧЬСЯ** *сов. см.* **остри́чься**

**ОБСТРОГА́ТЬ** *сов. что* йышыу, йышып шымартыу, йышып (шымартып) сығыу; **обстрога́ть до́ску** таҡтаны йышып шымартыу

**ОБСТРО́ИТЬ** *сов. что*; *разг.* тирәләй (әйләнәһенә) һалыу, тирәләй (әйләнәһенә) төҙөү, төҙөп (һалып) сығыу; **обстро́ить пло́щадь дома́ми** майҙан тирәләй өйҙәр һалыу (төҙөү)

**ОБСТРО́ИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* өй (йорт-ҡура) һалып инеү (кереү), төҙөкләнеү, яңырыу; **переселе́нцы обстро́ились** күскенселәр йорт-ҡура һалып инде; **дере́вня за́ново обстро́илась** ауыл төҙөкләнде (яңырҙы)

**ОБСТРОЧИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ситен ҡайып сығыу, ситен бөгөү; **обстрочи́ть плато́к** яулыҡтың ситен ҡайып сығыу

**ОБСТРУГА́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **обстрога́ть**

**ОБСТРУ́КЦИЯ** *ж*; *книжн.* (*намеренный срыв чего-л. в знак протеста*) обструкция, йыйылышты боҙоу; **парла́ментская обстру́кция** парламент йыйылышын боҙоу; **устро́ить ора́тору обстру́кцию** һөйләүсегә обструкция ойоштороу

**ОБСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **обступи́ть**

**ОБСТУПИ́ТЬ** *сов.* 1. *кого-что* һырып (ҡамап, уратып) алыу, ҡамалау; **обступи́ть расска́зчика** һөйләүсене һырып алыу; **о́зеро обступи́ло лес** күл урман менән ҡамалған 2. *кого*; *перен.* солғап алыу; **его́ обступи́ли мы́сли** уны уйҙар солғап алды

**ОБСУДИ́ТЬ** *сов. что* тикшереү, фекер алышыу; **обсуди́ть но́вый прое́кт** яңы проект тураһында фекер алышыу; **обсуди́ть вопро́с** мәсьәләне тикшереү

**ОБСУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **обсуди́ть**

**ОБСУЖДЕ́НИЕ** *с см.* **обсуди́ть**; **поста́вить вопро́с на обсужде́ние** мәсьәләне тикшереүгә ҡуйыу; **приня́ть уча́стие в обсужде́нии** фекер алышыуҙа ҡатнашыу

**ОБСУ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **обсуши́ть**

**ОБСУ́ШИВАТЬСЯ** *несов.* 1. *см.* **обсуши́ться** 2. *страд. от* **обсу́шивать**

**ОБСУШИ́ТЬ** *сов. кого-что* киптереү, ҡоротоу, киптереп (ҡоротоп) алыу; **обсуши́ть оде́жду** кейем-һалымды киптереп алыу

**ОБСУШИ́ТЬСЯ** *сов.* кибенеү, кибенеп алыу, өҫ-башты киптереү; **обсуши́ться у костра́** ут янында кибенеү

**ОБСЧЁТ** *м см.* **обсчита́ть**

**ОБСЧИТА́ТЬ** *сов. кого* алдап иҫәпләү, алдап кәм биреү, алдап биреп еткермәү; **обсчита́ть покупа́теля** һатып алыусыны алдап, кәм биреү; **обсчита́ть в пре́мии** премияны алдап биреп еткермәү

**ОБСЧИТА́ТЬСЯ** *сов.* яңылыш иҫәпләү (һанау); **обсчита́лись на большу́ю су́мму** ҙур сумманы яңылыш иҫәпләгәндәр

**ОБСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **обсчита́ть**

**ОБСЧИ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обсчита́ться 2.** *страд. от* **обсчи́тывать**

**ОБСЫ́ПАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* һибеү, өҫтөнә һибеү, һибеп сығыу; **обсы́пать торт са́харом** торт өҫтөнә шәкәр һибеү **2.** *что* һырып алыу; **воробьи́ обсы́пали куст** турғайҙар ҡыуаҡты һырып алған **3.** *что* ҡаплау, ҡаплап алыу; **звёзды обсы́пали всё не́бо** йондоҙҙар күк йөҙөн ҡаплап алған

**ОБСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **обсы́пать**

**ОБСЫ́ПАТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **осы́паться**

**ОБСЫПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обсы́паться 2.** *страд. от* **обсыпа́ть**

**ОБСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **обсо́хнуть**

**ОБТА́ИВАТЬ** *несов. см.* **обта́ять**

**ОБТАЧА́ТЬ** *сов. что* үтәләй (үтәнән-үтә) тегеү, үтәләй тегеп сығыу; **обтача́ть загото́вки сапо́г** итек киҫәктәрен үтәләй тегеп сығыу

**ОБТА́ЧИВАТЬ I** *несов. см.* **обтача́ть**

**ОБТА́ЧИВАТЬ II** *несов. см.* **обточи́ть**

**ОБТА́ЯТЬ** *сов.* (өҫтө, сите, ҡыры) ирееп төшөү, иреү; **льди́на обта́яла** боҙҙоң ҡыры ирегән; **снег вокру́г костра́ обта́ял** ут тирәһендәге ҡар ирегән; **го́ры обта́яли** тауҙағы ҡарҙар иреп бөткән; **доро́га обта́яла** юлдағы ҡар ирегән

**ОБТЕКА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обтека́ть 2.** *прил.* шыма, ҡытыршы булмаған; **обтека́емая фо́рма** шыма форма **3.** *прил.*; *перен.*, *разг.*, *ирон.* (*уклончивый*) икеле-микеле, асыҡ (тура) әйтелмәгән; **обтека́емый отве́т** икеле-микеле яуап

**ОБТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **обте́чь**

**ОБТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* **1.** һөртөү, һөртөп алыу, ҡоротоу, ҡорота биреү; **обтере́ть косу́ траво́й** салғыны үлән менән һөртөү; **обтере́ть пыль** туҙанды һөртөп алыу; **обтере́ть слёзы** күҙ йәшен һөртөү **2.** (*растереть с лечебной целью*) ышҡыу; **обтере́ть те́ло вла́жным полоте́нцем** тәнде еүеш таҫтамал менән ышҡыу **3.** (*сгладить*) шымартыу; **вода́ обтёрла ка́мень** һыу ташты шымартҡан

**ОБТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** һөртөнөү; **обтере́ться полоте́нцем** таҫтамалға һөртөнөү **2.** *разг.* ыуыныу, ышҡыныу; **обтере́ться спи́ртом** спирт менән ыуыныу **3.** *разг.* (*обноситься*) ышҡылып (өйкәлеп) туҙыу, таушалыу; **рукава́ обтёрлись** еңдәр ышҡылып туҙған; **стул обтёрся** ултырғыс ышҡылып туҙған

**ОБТЕРПЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* күнегеү, күнегеп китеү; **понемно́гу обтерпе́ться** әкренләп күнегеп китеү

**ОБТЕСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* юныу; (*бревно*, *камень*) шымартыу; (*стены сруба изнутри*) сутлау; **обтеса́ть па́лку** ағас киҫәген юныу; **обтеса́ть бревно́** бүрәнәне сутлау; **обтеса́ть ка́мень** ташты шымартыу; **обтеса́ть сте́ны в но́вом до́ме** яңы өйҙөң стеналарын сутлау **2.** *кого*; *перен.*, *прост.* (*сделать культурнее*) шымартыу, аҡылға ултыртыу, ыҡҡа килтереү, әҙәпле итеү; **обтеса́ть упря́мца** кире кешене ыҡҡа килтереү

**ОБТЕСА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* шымарыу, әҙәплерәк булып китеү; **успе́ть обтеса́ться** шымарып өлгөрөү

**ОБТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **обтеса́ть**

**ОБТЁСЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обтеса́ться 2.** *страд. от* **обтёсывать**

**ОБТЕ́ЧЬ** *сов. что* и *без доп.* **1.** тирәләй (уратып) ағыу; **обте́чь о́стров** утрауҙы уратып ағыу **2.** *перен.* ситләтеп (уратып) үтеү, урап уҙыу; **война́ обтекла́ э́то село́** һуғыш был ауылды ситләтеп үтте

**ОБТИРА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **обтира́ть**, **обтира́ться 2.** (*лечебная процедура*) тәнде һылау (ышҡыу, ыуыу)

**ОБТИРА́ТЬ** *несов. см.* **обтере́ть**

**ОБТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обтере́ться 2.** *страд. от* **обтира́ть**

**ОБТОЧИ́ТЬ** *сов. что* ҡырып (ҡырҙырып) алыу, (ҡырып) шымартыу (эшкәртеү) (*станокта*); **обточи́ть дета́ль** деталде ҡырып эшкәртеү; **обточи́ть пове́рхность** өҫтөн (тирә-яғын) ҡырып шымартыу; **волна́ обточи́ла ка́мень** тулҡын ташты шымартҡан

**ОБТО́ЧКА** *ж см.* **обточи́ть**; **обто́чка вало́в** валдарҙы ҡырып эшкәртеү

**ОБТРЁПАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **обтрепа́ть 2.** *прил.* ҡырылған, таушалған, өлтөрәгән; **обтрёпанная шине́ль** ҡырылған шинель; **обтрёпанные брю́ки** өлтөрәгән салбар

**ОБТРЕПА́ТЬ** *сов. что* өлтөрәтеү, ҡырыу, ҡырып (туҙҙырып, өлтөрәтеп) бөтөрөү; **обтрепа́ть рукава́** еңдәрҙе туҙҙырып бөтөрөү

**ОБТРЕПА́ТЬСЯ** *сов.* өлтөрәү, ҡырылыу, таушалыу, өлтөрәп (ҡырылып, таушалып) бөтөү; **бахрома́ ска́терти обтрепа́лась** ашъяулыҡтың сәсәге өлтөрәп бөткән; **подо́л обтрепа́лся** итәк осо ҡырылған

**ОБТЯ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **обтяну́ть**

**ОБТЯ́ЖКА** *ж* **1.** *см.* **обтяну́ть 2.** (*то, чем обтянуто что-л.*) көплөк, тыш; **дива́н с ко́жаной обтя́жкой** тышы күн диван ♦ **в обтя́жку** тәнгә һылашып тора (*кейемгә ҡарата*)

**ОБТЯНУ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тышлау, көпләү; **обтяну́ть дива́н мате́рией** диванды туҡыма менән тышлау **2.** *кого-что* (*об одежде*) тәнгә һылашып (кипсәлеп) тороу; **пла́тье обтяну́ло её фигу́ру** күлдәк уның тәненә һылашып тора

**ОБУВА́ТЬ** *несов. см.* **обу́ть**

**ОБУВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обу́ться 2.** *страд. от* **обува́ть**

**ОБУВНО́Й,** -ая, -ое аяҡ кейеме ...ы; **обувна́я фа́брика** аяҡ кейеме фабрикаһы

**ОБУВЩИ́К** *м* аяҡ кейеме тегеүсе

**О́БУВЬ** *ж* аяҡ кейеме; **ко́жаная о́бувь** күн аяҡ кейеме; **ле́тняя о́бувь** йәйге аяҡ кейеме; **де́тская о́бувь** балалар аяҡ кейеме

**ОБУ́ГЛИВАНИЕ** *с см.* **обу́глить, обу́глиться**

**ОБУ́ГЛИВАТЬ** *несов. см.* **обу́глить**

**ОБУ́ГЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обу́глиться 2.** *страд. от* **обу́гливать**

**ОБУ́ГЛИТЬ** *сов. что* өҫтөн күмерләндереү

**ОБУ́ГЛИТЬСЯ** *сов.* күмерләнеү; **поле́но обу́глилось** утын күмерләнде

**ОБУ́ЗА** *ж* мәшәҡәт, йөк, имгәк; **быть обу́зой** имгәк булыу; **ли́шняя обу́за** артыҡ мәшәҡәт; **взять на себя́ обу́зу** үҙ өҫтөнә йөк алыу

**ОБУЗДА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* йүгәнләү, йүгән кейҙереү, ауыҙлыҡлау, нуҡталау; **обузда́ть коня́** атты йүгәнләү **2.** *кого-что*; *перен.* йүгәнләү, тыйыу, ауыҙлыҡлау; **обузда́ть агре́ссора** агрессорҙы ауыҙлыҡлау; **обузда́ть свой гнев** асыуҙы тыйыу

**ОБУ́ЗДЫВАТЬ** *несов. см.* **обузда́ть**

**ОБУРЕВА́ТЬ** *несов. кого-что* тулҡынландырыу, ныҡ борсоу; **его́ обурева́ют сомне́ния** уны шикләнеүҙәр ныҡ борсой

**ОБУСЛО́ВИТЬ** *сов. что* **1.** (*оговорить*) шарт ҡуйыу, шарт менән сикләү; **обусло́вить получе́ние льго́ты** льгота алыуҙа шарт ҡуйыу; **обусло́вить догово́р сро́ком** килешеүҙе ваҡыт шарты менән сикләү **2.** (*послужить причиной*) сәбәп(се) булыу; **обусло́вить успе́х** уңыш сәбәбе булыу

**ОБУСЛО́ВЛЕННОСТЬ** *ж* бәйләнгәнлек, бәйле (шартлы, сәбәпле) булыу; **обусло́вленность явле́ний** күренештәрҙең бәйле булыуы

**ОБУ́ТЬ** *сов. кого-что* аяғына (аяҡҡа) кейҙереү; **обу́ть ребёнка** баланың аяғына кейҙереү **2.** *что*; *разг.* аяҡҡа кейеү; **обу́ть сапоги́** аяҡҡа итек кейеү; **обу́ть ва́ленки** аяҡҡа быйма кейеү **3.** *кого-что*; *перен.*, *разг.* (*снабдить обувью*) аяҡ кейеме менән тәьмин итеү

**ОБУ́ТЬСЯ** *сов.* аяҡҡа кейеү

**О́БУХ** и **ОБУ́Х** *м* төйҙә ♦ **как (то́чно, бу́дто) о́бухом по голове́** башҡа күҫәк менән һуҡҡандай булды

**ОБУЧА́ТЬ** *несов. см.* **обучи́ть**

**ОБУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обучи́ться 2.** *страд. от* **обуча́ть**

**ОБУЧЕ́НИЕ** *с см.* **обучи́ть, обучи́ться**; **беспла́тное обуче́ние** түләүһеҙ уҡытыу; **зао́чное обуче́ние** ситтән тороп уҡыу

**ОБУЧИ́ТЬ** *сов. кого-что, чему* уҡытыу, өйрәтеү; **обучи́ть ру́сскому языку́** урыҫ теленә өйрәтеү; **обучи́ть мастерству́** оҫталыҡҡа өйрәтеү; **обучи́ть дете́й му́зыке** балаларҙы музыкаға уҡытыу

**ОБУЧИ́ТЬСЯ** *сов. чему* и *с неопр.* өйрәнеү, уҡыу; **обучи́ться гра́моте** уҡырға-яҙырға өйрәнеү

**ОБУШО́К** *м* **1.** бәләкәй төйҙә **2.** *горн.* (*инструмент*) бәләкәй кәйлә

**ОБУЯ́ТЬ** *сов. кого-что* солғап (биләп) алыу; **его́ обуя́л страх** уны ҡурҡыу солғап алды; **его́ обуя́ла тоска́** уны һағыш биләп алды

**ОБХА́ЖИВАТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* ялағайланыу, ялағайланып йөрөү, ялағайлыҡ күрһәтеү; **обха́живать ну́жного челове́ка** кәрәк кешегә ялағайланыу

**ОБХВА́Т** *м* **1.** *разг. см.* **обхвати́ть 2.** ҡолас, ҡосаҡ; **дуб в три обхва́та** өс ҡоласлы имән **3.** йыуанлыҡ; **дере́вья от 2 до 3 метров в обхва́те** ике-өс метр йыуанлыҡтағы ағастар

**ОБХВАТИ́ТЬ** *сов. см.* **охвати́ть**

**ОБХВА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **обхвати́ть**

**ОБХО́Д** *м* **1.** *см.* **обходи́ть** I; **2.** (*место*) урап үтә торған юл, урау юл; **найти́ обхо́д** урап үтә торған юл табыу ♦ **в обхо́д**: 1) (*кругом*) уратып, ситләтеп; **в обхо́д дере́вни** ауылды ситләтеп; 2) (*уклоняясь от соблюдения*) боҙоп, таныммай(ынса), буйһонмай; **в обхо́д зако́на** законға буйһонмай; 3) *воен.* (*окружая*) тылға инеп; **в обхо́д проти́вника** дошмандың тылына инеп

**ОБХОДИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* яҡшы мөғәмәлә, илтифатлылыҡ, кеселеклелек

**ОБХОДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яҡшы мөғәмәләле, илтифатлы, кеселекле; **обходи́тельный челове́к** илтифатлы кеше

**ОБХОДИ́ТЬ I** *несов. см.* **обойти́**

**ОБХОДИ́ТЬ II** *сов. что*; *разг.* әйләнеп (йөрөп, урап) сығыу; **обходи́ть весь го́род** бөтә ҡаланы йөрөп сығыу

**ОБХОДИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обойти́сь 2.** *страд. от* **обходи́ть** I

**ОБХОДНО́Й** и **ОБХО́ДНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *воен.* уратып алыу ...ы, ҡамау ...ы; **обходно́й манёвр** (дошманды) ҡамау манёвры **2.** урау; **обходна́я доро́га** урау юл **3.** *перен.* тыйылған, хәйләле; **доби́ться обходны́м путём** хәйләле юл менән берәй нәмәгә ирешеү ♦ **обходно́й лист** обход ҡағыҙы (*эштән киткәндә тултырыла*)

**ОБХО́ДЧИК** *м* йөрөп ҡараусы; **путево́й обхо́дчик** йөрөп юл ҡараусы

**ОБХОЖДЕ́НИЕ** *с* мөғәмәлә, эш итеш; **ве́жливое обхожде́ние** әҙәпле мөғәмәлә

**ОБЧЕ́СТЬСЯ: раз-два и обчёлся** *разг.* бик аҙ, бармаҡ менән генә һанарлыҡ

**ОБЧИ́СТИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* таҙартыу; **обчи́стить по́лы шу́бы** тундың сабыуын таҙартыу **2.** *что*; *разг.* (*удалить кожицу*) (ҡабығын) әрсеү; **обчи́стить апельси́н** әфлисундың ҡабығын әрсеү **3.** *кого-что*; *перен.*, *прост.* (*обокрасть*) урлау, урлап сығыу

**ОБЧИ́СТИТЬСЯ** *сов.* таҙарыныу, сүп-сарҙан арыныу; **обчи́ститься по́сле рабо́ты** эштән һуң таҙарыныу

**ОБЧИЩА́ТЬ** *несов. см.* **обчи́стить**

**ОБЧИЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **обчи́ститься 2.** *страд. от* **обчища́ть**

**ОБША́РИВАТЬ** *несов. см.* **обша́рить**

**ОБША́РИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡапшап (ҡармап, аҡтарып) ҡарау, ҡапшап ҡарап (әҙләп) сығыу, тикшереп (аҡтарып ҡарап) сығыу; **обша́рить челове́ка** кешене ҡапшап ҡарау; **обша́рить сунду́к** һандыҡты аҡтарып ҡарау; **обша́рить весь дом** бөтә өйҙө тикшереп сығыу

**ОБШИВА́ТЬ** *несов. см.* **обши́ть**

**ОБШИ́ВКА** *ж* **1.** *см.* **обши́ть 2.** ҡайма; **кружевна́я обши́вка** селтәр ҡайма **3.** (*обивка*) тыш, көп; **деревя́нная обши́вка су́дна** судноның ағас көбө; **желе́зная обши́вка две́ри** ишектең тимер көбө

**ОБШИ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* көплөк, тышлыҡ; **обши́вочный материа́л** тышлыҡ материал

**ОБШИ́РНЫЙ,** -ая, -ое *прям.*, *перен.* бик ҙур, киң; **обши́рный сад** бик ҙур баҡса; **обши́рные пло́щади** киң майҙандар; **обши́рные пла́ны** бик ҙур пландар; **обши́рные позна́ния** киң белем

**ОБШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *чем* ҡаймалау, ҡайма баҫыу (тотоу), (ситләп) тегеү, (ситләп) теғеп сығыу, төрөп (урап) тегеү, тышлау; **обши́ть рукава́ кружева́ми** ең остарына селтәр тегеү; **обши́ть во́рот ме́хом** яғаны тире менән ҡаймалау; **обши́ть посы́лку мате́рией** посылканы туҡымаға төрөп тегеү **2.** *чем* көпләү (*таҡта, тимер һ.б.*); **обши́ть дом тёсом** өйҙө йоҡа таҡта менән көпләү; **обши́ть дверь пороло́ном** ишекте поролон менән көпләү **3.** *кого-что*; *разг.* (кейем) тегеп биреү; **обши́ть всю семью́** бөтә ғаиләгә кейем тегеп биреү

**ОБШЛА́Г** *м* ең ҡайтармаһы

**ОБЩА́ТЬСЯ** *несов.* аралашыу, ҡатнашыу, ҡатышыу; **обща́ться с друзья́ми** дуҫтар менән аралашыу

**ОБЩЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "дөйөм", "ғәҙәттәге", "барыһы (бөтәһе, бөтөнөһө, һәр кем) өсөн дә бер" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **общенациона́льный** дөйөм милли; **общереспублика́нский** дөйөм республика; **общеобяза́тельный** һәр кемгә лә мәжбүри; **общеизве́стный** бөтәһенә лә билдәле

**ОБЩЕВОЙСКОВО́Й,** -ая, -ое дөйөм ғәскәри; **общевойсково́й уста́в** дөйөм ғәскәри устав

**ОБЩЕГОРОДСКО́Й,** -ая, -ое дөйөм ҡала ...ы; **общегородско́е собра́ние** дөйөм ҡала йыйылышы

**ОБЩЕГОСУДА́РСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое дөйөм дәүләт ...ы; **общегосуда́рственное значе́ние** дөйөм дәүләт әһәмиәтендәге; **общегосуда́рственные интере́сы** дөйөм дәүләт мәнфәғәттәре

**ОБЩЕДОСТУ́ПНОСТЬ** *ж* **1.** һәр кем (һатып) алырлыҡ булыу, һәр кемдең хәле етерлек булыу **2.** (*понятность*) һәр кемгә аңлайышлы булыу, һәр кемгә аңлайышлылыҡ; **общедосту́пность изложе́ния** әйткәндең һәр кемгә аңлайышлы булыуы

**ОБЩЕДОСТУ́ПНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һәр кем (һатып) алырлыҡ, һәр кемдең хәле етерлек (хәленән килерлек); **общедосту́пные це́ны** һәр кемдең хәле етерлек хаҡтар; **общедосту́пные сре́дства** һәр кемдең хәленән килерлек саралар **2.** һәр кемгә аңлайышлы, һәр кем аңларлыҡ; **общедосту́пная статья́** һәр кем аңларлыҡ мәҡәлә

**ОБЩЕЖИТЕ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое көндәлек тормошҡа хас, тормошта йыш осрай торған; **общежите́йские дела́** көндәлек тормошҡа хас эштәр

**ОБЩЕЖИ́ТИЕ** *с* **1.** ятаҡ, ятаҡхана; **студе́нческое общежи́тие** студенттар ятағы **2.** (*общественный быт*) бергә йәшәү (тороу), йәмғиәт тормошо, ижтимағи тормош; **пра́вила челове́ческого общежи́тия** кешеләрҙең бергә йәшәү ҡағиҙәләре

**ОБЩЕЗАВОДСКО́Й** и *уст.* **ОБЩЕЗАВО́ДСКИЙ,** -ая, -ое дөйөм завод ...ы; **общезаводско́е совеща́ние** дөйөм завод кәңәшмәһе

**ОБЩЕИЗВЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое һәр кемгә билдәле (мәғлүм), һәр кем белгән; **общеизве́стная и́стина** һәр кемгә билдәле хәҡиҡәт

**ОБЩЕНАРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое дөйөм (бөтә) халыҡ ...ы; **общенаро́дное достоя́ние** дөйөм халыҡ милке; **общенаро́дный пра́здник** бөтә халыҡ байрамы

**ОБЩЕНАЦИОНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дөйөм милли, дөйөм (бөтөн) милләт ...ы; **общенациона́льный язы́к** дөйөм милли тел

**ОБЩЕ́НИЕ** *с* аралашыу, бәйләнеш, ҡатнашыу; **те́сное обще́ние** тығыҙ бәйләнеш (аралашыу); **обще́ние с людьми́** кешеләр менән аралашыу

**ОБЩЕОБРАЗОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое дөйөм белем ...ы; **общеобразова́тельная шко́ла** дөйөм белем биреү мәктәбе

**ОБЩЕПИ́Т** *м* (*общественное питание*) йәмәғәт туҡланыуы

**ОБЩЕПРИ́ЗНАННЫЙ,** -ая, -ое һәр кем тарафынан танылған; **общепри́знанный авторите́т** һәр кем тарафынан танылған абруй

**ОБЩЕПРИ́НЯТЫЙ,** -ая, -ое дөйөм ҡабул ителгән; **общепри́нятый поря́док** дөйөм ҡабул ителгән тәртип

**ОБЩЕРЕСПУБЛИКА́НСКИЙ,** -ая, -ое дөйөм республика ...ы; **общереспублика́нское совеща́ние** дөйөм республика кәңәшмәһе

**ОБЩЕ́СТВЕННИК** *м* и **ОБЩЕ́СТВЕННИЦА** *ж* йәмәғәтсе

**ОБЩЕ́СТВЕННОСТЬ** *ж* йәмәғәтселек; **нау́чная обще́ственность** фәнни йәмәғәтселек; **обще́ственность институ́та** институт йәмәғәтселеге

**ОБЩЕ́СТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ижтимағи; **обще́ственный строй** ижтимағи ҡоролош **2.** йәмғиәт...ы; **зако́ны обще́ственного разви́тия** йәмғиәт үҫеше ҡанундары **3.** йәмәғәт ...ы, йәмәғәтселек ...ы; **обще́ственная со́бственность** йәмәғәт милке; **обще́ственные интере́сы** йәмәғәтселек мәнфәғәттәре; **обще́ственное мне́ние** йәмәғәтселек фекере; **обще́ственные дела́** йәмәғәт эштәре; **обще́ственные организа́ции** йәмәғәт ойошмалары **4.** (*совместный*) бергәләп; **обще́ственная обрабо́тка земли́** ерҙе бергәләп эшкәртеү **5.** (*любящий общество, компанию*) йәмәғәтсел; **он челове́к обще́ственный** ул йәмәғәтсел кеше ♦ **на обще́ственных нача́лах** түләүһеҙ, бушлай

**О́БЩЕСТВО** *с* **1.** *в разн. знач.* йәмғиәт, ойошма; **нау́ка об о́бществе** йәмғиәт тураһындағы фән; **челове́ческое о́бщество** кешелек йәмғиәте; **демократи́ческое о́бщество** демократик йәмғиәт; **спорти́вное о́бщество** спорт ойошмаһы; **акционе́рное о́бщество** акционерҙар йәмғиәте **2.** (*круг людей, объединённых общностью положения, происхождения*) ҡатлам; **дворя́нское о́бщество** дворяндар ҡатламы; **образо́ванное о́бщество** уҡымышлы кешеләр ҡатламы **3.** (*среда, компания*) ҡор, ара, даирә, компания, мәжлес; **в о́бществе друзе́й** дуҫтар араһында (ҡоронда); **дурно́е о́бщество** әҙәпһеҙ кешеләр араһы; **душа́ о́бщества** мәжлес(тең) күрке; **взять в о́бщество** ҡорға алыу

**ОБЩЕСТВОВЕ́Д** *м*; *разг.* йәмғиәт белеме уҡытыусыһы

**ОБЩЕСТВОВЕ́ДЕНИЕ** *с* йәмғиәт тураһында фән, йәмғиәт белеме, йәмғиәтте өйрәнеү

**ОБЩЕУПОТРЕБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бөтәһе ҡуллана торған, дөйөм ҡулланылыштағы; **общеупотреби́тельное сре́дство** бөтәһе ҡуллана торған сара; **общеупотреби́тельное выраже́ние** дөйөм ҡулланылыштағы әйтем

**ОБЩЕЧЕЛОВЕ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое бөтә кешелек өсөн уртаҡ; **общечелове́ческие пробле́мы** бөтә кешелек өсөн уртаҡ мәсьәләләр; **общечелове́ческие стремле́ния** бөтә кешелек өсөн уртаҡ ынтылыштар

**О́БЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *в разн. знач.* дөйөм, ғөмүм, ғөмүми; **о́бщие недоста́тки** дөйөм етешһеҙлектәр; **о́бщее пра́вило** дөйөм ҡағиҙә; **о́бщий ито́г** дөйөм йомғаҡ; **о́бщая сто́имость** дөйөм хаҡ; **о́бщие вопро́сы нау́ки** фәндең дөйөм мәсьәләләре; **о́бщее впечатле́ние** дөйөм тәьҫир **2.** уртаҡ; **о́бщая рабо́та** уртаҡ эш; **о́бщие и́гры** уртаҡ уйындар; **о́бщее иму́щество** уртаҡ мөлкәт; **о́бщий интере́с** уртаҡ мәнфәғәт ♦ **о́бщее ме́сто** бөтәһенә лә билдәле булған нәмә, күп сәйнәлгән нәмә; **о́бщее собра́ние** дөйөм йыйылыш; **в о́бщем** ғөмүмән алғанда; **в о́бщем и це́лом** дөйөм алғанда; **найти́ о́бщий язы́к** уртаҡ тел табыу; **нет (не име́ть) ни́чего о́бщего** с *кем-чем* бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмау

**О́БЩИНА** и **ОБЩИ́НА** *ж* **1.** *ист.* община (*элек берәй ер биләмәһендә халыҡтың үҙидара ойошмаһы*); **городска́я общи́на** ҡала общинаһы; **крестья́нская общи́на** крәҫтиән общинаһы **2.** (*общество, организация*) йәмғиәт, ойошма; **религио́зная о́бщина** дини ойошма

**ОБЩИ́ННЫЙ,** -ая, -ое община ...ы; **общи́нная земля́** община ере

**ОБЩИПА́ТЬ** *сов. кого-что* йолҡоу, йолҡоп бөтөү; **общипа́ть ку́рицу** тауыҡ йолҡоу

**ОБЩИ́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **общипа́ть**

**ОБЩИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* аралашыусанлыҡ, алсаҡлыҡ, кешегә ҡатнашыусан (аралашыусан) булыу

**ОБЩИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аралашыусан, алсаҡ, асыҡ (кешегә ҡатнашыусан); **общи́тельный челове́к** алсаҡ кеше

**О́БЩНОСТЬ** *ж* дөйөмлөк, уртаҡлыҡ, берлек; **о́бщность языка́** тел уртаҡлығы; **о́бщность взгля́дов** ҡараштар берлеге; **о́бщность це́ли** маҡсат уртаҡлығы

**ОБЪ...** *приставка см.* **о...**

**ОБЪЕДА́ТЬ** *несов. см.* **объе́сть**

**ОБЪЕДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **объе́сться** **2.** *страд. от* **объеда́ть**

**ОБЪЕДЕ́НИЕ** *с*; *разг.* (*о чём-л. очень вкусном*) ашап туймаҫлыҡ (туйғыһыҙ) тәмле булыу, телде йоторлоҡ тәмле булыу; **пиро́г — пря́мо объеде́ние** бәлеш ашап туйғыһыҙ тәмле

**ОБЪЕДИНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **объедини́ть — объединя́ть, объедини́ться — объединя́ться**; **объедине́ние сил** көстәрҙе берләштереү **2.** (*организация*) берекмә, берләшмә; **произво́дственное объедине́ние** производство (етештереү) берекмәһе; **литерату́рное объедине́ние** әҙәби берекмә; **объедине́ние профсою́зов** профсоюздар берләшмәһе

**ОБЪЕДИНЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **объедини́ть** **2.** *прил.* берләшкән, берләштерелгән; **объединённое заседа́ние** берләштерелгән ултырыш; **Организа́ция Объединённых На́ций (ООН)** Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы (БМО)

**ОБЪЕДИНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое берләшеү ...ы, берләштереү ...ы; **объедини́тельный съезд** берләшеү съезы

**ОБЪЕДИНИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** берләштереү, бергә ҡушыу; **объедини́ть ма́лые хозя́йства** бәләкәй хужалыҡтарҙы берләштереү **2.** туплау; **объедини́ть си́лы** көстәрҙе туплау

**ОБЪЕДИНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** берләшеү, ҡушылыу, бер бөтөн булыу; **два предприя́тия объедини́лись** ике предприятие ҡушылды; **объедини́ться в борьбе́ за мир** тыныслыҡ өсөн көрәштә берләшеү **2.** (*сплотиться*) берләшеү, тупланыу, берҙәм булыу

**ОБЪЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **объедини́ть**

**ОБЪЕДИНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **объедини́ться 2.** *страд. от* **объединя́ть**

**ОБЪЕ́ДКИ** *только мн.*; *разг.* ҡалдыҡ-боҫтоҡ, һыныҡ-мыныҡ

**ОБЪЕ́ЗД** *м* **1.** *см.* **объе́зжать** I, **объе́здить** — **объе́зжать** II; **2.** (*место*) урау юл, урап үтә торған юл

**ОБЪЕ́ЗДИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*побывать всюду*) әйләнеп (йөрөп, гиҙеп) сығыу; **объе́здить всю страну́** бөтә илде гиҙеп сығыу **2.** *кого* (*приучить ходить в упряжке или под седлом*) (менгегә, еккегә) өйрәтеү; **объе́здить ло́шадь** атты өйрәтеп алыу

**ОБЪЕЗДНО́Й,** -ая, -ое урау, (ситтән әйләнеп) үтмәле; **объездно́й путь** урау юл

**ОБЪЕ́ЗДЧИК** *м* **1.** (*сторож*) ҡарауылсы; **лесно́й объе́здчик** урман ҡарауылсыһы **2.** (*тот, кто занимается объездкой лошадей*) ат өйрәтеүсе

**ОБЪЕЗЖА́ТЬ I** *несов. см.* **объе́хать**

**ОБЪЕЗЖА́ТЬ II** *несов. см.* **объе́здить**

**ОБЪЕ́ЗЖИЙ,** -ая, -ее урау, алыҫ; **объе́зжая доро́га** урау юл

**ОБЪЕ́КТ** *м* **1.** *в разн. знач.* объект; **объе́кт восприя́тия** төшөнөү объекты; **объе́кт наблюде́ния** күҙәтеү объекты; **объе́кт изуче́ния** өйрәнеү объекты; **оборо́нный объе́кт** оборона объекты; **сдать объе́кт** объектты тапшырыу; **побыва́ть на объе́кте** объектта булыу **2.** *лингв.* тултырыусы

**ОБЪЕКТИ́В** *м* объектив (*оптик приборҙың бер өлөшө*); **объекти́в фотоаппара́та** фотоаппарат объективы

**ОБЪЕКТИВИ́ЗМ** *м* **1.** *филос.* объективизм, ялған объективлыҡ **2.** *см.* **объекти́вность** 2

**ОБЪЕКТИВИ́СТ** *м* объективист (*объективизм яҡлы кеше*)

**ОБЪЕКТИ́ВНОСТЬ** *ж* **1.** *филос.* объективлыҡ; **объекти́вность вне́шнего ми́ра** тышҡы донъяның объективлығы **2.** (*беспристрастность*) ғәҙеллек, объективлыҡ, туралыҡ, рыяһыҙлыҡ; **объекти́вность сужде́ний** фекерләүҙең объективлығы; **объекти́вность жюри́** жюриҙың ғәҙеллеге

**ОБЪЕКТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *филос.* объектив; **объекти́вная реа́льность** объектив ысынбарлыҡ **2.** (*беспристрастный*) ғәҙел, тоғро, тура, объектив; **объекти́вная оце́нка** ғәҙел баһа; **объекти́вное заключе́ние** объектив һығымта

**ОБЪЁМ** *м*; *в разн. знач.* күләм, дәүмәл, кимәл; **объём ку́ба** кубтың дәүмәле; **объём зда́ния** бинаның күләме; **объём рабо́т** эш күләме; **объём зна́ний** белем кимәле; **объём информа́ции** мәғлүмәт күләме; **объём торго́вли** сауҙа күләме; **изме́рить объём** дәүмәл(де) үлсәү; **увели́чить объём** күләм арттырыу

**ОБЪЁМИСТЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҙур күләмле, бик ҙур; **объёмистое произведе́ние** күләмле әҫәр; **объёмистая ча́ша** бик ҙур сеүәтә

**ОБЪЁМНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күләм ...ы; **объёмное измере́ние** күләм үлсәме **2.** күләм яғынан; **объёмный ана́лиз** күләм яғынан анализ **3.** *разг. см.* **объёмистый ♦ объёмное изображе́ние** күләмде дөрөҫ сағылдырған һүрәт

**ОБЪЕ́СТЬ** *сов.* **1.** *что* ян-яҡлап ашау, тирәләй (ситен) кимереү (кимереп сығыу); **объе́сть кость** һөйәкте тирәләй кимереү **2.** *кого*; *перен.* (*съев много, причинить ущерб*) убып китеү, өләшкә инеү; **не объедя́т же нас** убып китмәҫтәр эле

**ОБЪЕ́СТЬСЯ** *сов.* күп (артыҡ, ғарҡ булғансы) ашау

**ОБЪЕ́ХАТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*проехать вокруг или стороной*) урап (уратып, ситләтеп) үтеү; **объе́хать боло́то** һаҙлыкты урап үтеү; **объе́хать ка́мень** ташты ситләтеп үтеү **2.** (*ездя, побывать всюду*) йөрөп (гиҙеп, әйләнеп) сығыу, ҡыҙырып сығыу; **объе́хать всех знако́мых** бөтә таныштарҙы йөрөп сығыу **3.** *разг.* (*перегнать*) үтеп (уҙып) китеү; **объе́хать е́дущую впереди́ маши́ну** алдағы машинаны уҙып китеү **♦ на козе́ (на криво́й и т.п.) не объе́дешь** *кого*; *прост.* алдай алмаҫһың, тишек шүмәнгә ултырта алмаҫһың

**ОБЪЯВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, о чём* и *с союзом "что"* белдереү, иғлан итеү, әйтеү, биреү; **объяви́ть благода́рность** рәхмәт белдереү; **объяви́ть о нача́ле заня́тий** уҡыуҙар башланыу тураһында белдереү; **объяви́ть прика́з** бойороҡ иғлан итеү; **объяви́ть ко́нкурс** конкурс иғлан итеү; **объяви́ть вы́говор** шелтә биреү **2.** *кого-что, кем-чем, каким* (*официально признать*) иғлан итеү, рәсми (рәүештә) белдереү; **объяви́ть команди́ром** командир тип иғлан итеү; **объяви́ть собра́ние откры́тым** йыйылышты асыҡ тип иғлан итеү **3.** (*официально заявить о начале чего-л.*) иғлан итеү; **объяви́ть войну́** һуғыш иғлан итеү; **объяви́ть подпи́ску на газе́ты** гәзиттәргә яҙылыуҙы иғлан итеү

**ОБЪЯВИ́ТЬСЯ** *сов.* килеп сығыу, табылыу; **а вот и он объяви́лся** бына ул үҙе лә килеп сыҡты

**ОБЪЯВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **объяви́ть** — **объявля́ть 2.** иғлан, белдереү; **доска́ объявле́ний** иғландар таҡтаһы; **пове́сить объявле́ние** белдереү элеп ҡуйыу

**ОБЪЯВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **объяви́ть**

**ОБЪЯВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **объяви́ться 2.** *страд. от* **объявля́ть**

**ОБЪЯСНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **объясни́ть** — **объясня́ть 2.** (*разговор*) аңлашыу, һөйләшеү; **объясне́ние с отцо́м** атай менән аңлашыу; **дли́нное объясне́ние** оҙаҡ һөйләшеү **3.** *обычно мн.* (*признание в чём-л.*) аңлатма, төшөндөрмә; **вы́слушать объясне́ния** аңлатмаларға ҡолаҡ һалыу; **приня́ть объясне́ния** аңлатмаларҙы ҡабул итеү; **предста́вить объясне́ния** аңлатма яҙып биреү **4.** (*указание на причину*) сәбәп; **разу́мное объясне́ние** аҡыллы, төплө сәбәп ♦ **объясне́ние в любви́** мөхәббәтеңде белдереү (әйтеү)

**ОБЪЯСНИ́МЫЙ,** -ая, -ое аңлайышлы, аңлатып була торған, аңлашыла торған; **объясни́мое жела́ние** аңлашыла торған теләк; **его́ поведе́ние легко́ объясни́мо** уның ғәҙәте еңел аңлашыла

**ОБЪЯСНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аңлатмалы, аңлатып (аңлатма) бирә торған; **объясни́тельная запи́ска** аңлатмалы яҙма

**ОБЪЯСНИ́ТЬ** *сов. что* аңлатыу, аңлатып (төшөндөрөп) биреү, төшөндөрөү; **объясни́ть пра́вило** ҡағиҙәне аңлатып биреү; **объясни́ть зада́чу** мәсьәләне төшөндөрөү

**ОБЪЯСНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** аңлашыу, һөйләшеү, һөйләшеп алыу; **объясни́ться по де́лу** эш буйынса һөйләшеү **2.** (*стать понятным*) аңлашылыу, асыҡланыу, билдәле булыу; **всё ско́ро объясни́лось** бөтәһе лә тиҙҙән асыҡланды ♦ **объясни́ться в любви́** мөхәббәтеңде белдереү

**ОБЪЯСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **объясни́ть**

**ОБЪЯСНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **объясни́ться 2.** (*вести беседу*) аңлашыу, һөйләшеү; **объясня́ться же́стами** ым менән аңлашыу **3.** *чем* аңлатылыу, бәйләнгән булыу; **э́то объясня́ется це́лым ря́дом тру́дностей** был күп ҡаршылыҡтарға бәйләнгән **4.** *страд. от* **объясня́ть**

**ОБЪЯ́ТИЕ** *с* ҡолас, ҡосаҡ; **раскры́ть объя́тия** ҡолас йәйеү; **заключи́ть в объя́тия** ҡосаҡҡа алыу; **бро́ситься в объя́тия** ҡосаҡҡа ташланыу; **в объя́тиях пла́мени** ялҡын ҡосағында ♦ **души́ть в объя́тиях** *см.* **души́ть**; **приня́ть (встре́тить) с распростёртыми объя́тиями** *кого* ҡуш ҡуллап ҡаршы алыу, ҡосаҡ йәйеп ҡаршылау

**ОБЪЯ́ТЬ** *сов.*; *книжн.*, *уст. см.* **обня́ть**

**ОБЫВА́ТЕЛЬ** *м* обыватель, тар ҡарашлы ир-ат; **обыва́тельница** *ж* обыватель, тар ҡарашлы ҡатын-ҡыҙ (*үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыусы*)

**ОБЫВА́ТЕЛЬСКИЙ,** -ая, -ое обывателдәрсә, обывателдәргә хас; **обыва́тельские взгля́ды** обывателдәрсә ҡараштар

**ОБЫВА́ТЕЛЬЩИНА** *ж* обывателлек, тар ҡарашлылыҡ

**ОБЫГРА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* отоу, еңеп сығыу; **обыгра́ть в ша́хматы** шахмат уйынында еңеп сығыу **2.** *что*; *разг.* уйнап тауышын яҡшыртыу; **обыгра́ть скри́пку** уйнап скрипканың тауышын яҡшыртыу **3.** *что*; *разг.* үҙ файҙаңа ҡулланыу, файҙаланыу; **обыгра́ть оши́бку собесе́дника** әңгәмәсенең хатаһынан файҙаланыу

**ОБЫ́ГРЫВАТЬ** *несов. см.* **обыгра́ть**

**ОБЫ́ДЕННОСТЬ** *ж* ғәҙәтилек, ғәҙәттәгесә, ғәҙәти булғанлыҡ (булыу), көндәгесә булыу

**ОБЫ́ДЕННЫЙ,** -ая, -ое ғәҙәттәге, көндәге, ғәҙәти, һәр ваҡыттағы; **обы́денное явле́ние** ғәҙәти күренеш; **обы́денные забо́ты** көндәге мәшәҡәттәр

**ОБЫДЁНЩИНА** *ж* көн дә ҡабатлана торған нәмә

**ОБЫКНОВЕ́НИЕ** *с* ғәҙәт, ғәҙәттәге тәртип; **по обыкнове́нию** ғәҙәттәгесә; **про́тив обыкнове́ния** ғәҙәттәгегә ҡаршы; **по своему́ обыкнове́нию** үҙенең ғәҙәте буйынса

**ОБЫКНОВЕ́ННО** *нареч.* ғәҙәттә, ғәҙәтсә; **обыкнове́нно он возвраща́ется по́здно** ғәҙәттә ул һуң ҡайта

**ОБЫКНОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*постоянный, обычный*) ғәҙәти, ғәҙәттәге, көндәлек; **обыкнове́нное де́ло** ғәҙәттәге эш; **обыкнове́нная жизнь** көндәлек тормош **2.** (*заурядный*) ябай, уртаса, ғәҙәти; **обыкнове́нная исто́рия** ғәҙәти ваҡиға; **обыкнове́нный челове́к** ябай кеше

**О́БЫСК** *м* тентеү; **произвести́ о́быск** тентеү үткәреү

**ОБЫСКА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* тентеү, тентеп сығыу; **обыска́ть дом** өйҙө тентеп сығыу **2.** *что* (*осмотреть всё*) эҙләү, эҙләп (ҡарап, аҡтарып) сығыу; **обыска́ть все карма́ны** бөтә кеҫәләрен ҡарап сығыу; **обыска́ть маши́ну** машинаның эсен ҡарап сығыу

**ОБЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **обыска́ть**

**ОБЫ́ЧАЙ** *м* йола, ғөрөф-ғәҙәт; **стари́нные обы́чаи** боронғо йолалар; **обы́чаи пре́дков** ата-бабалар йолаһы; **войти́ в обы́чай** йолаға әйләнеү ♦ **в обы́чае** *кого-чего* ғәҙәткә ингән (әйләнгән)

**ОБЫ́ЧНО** *нареч.* ғәҙәттә; **как обы́чно** ғәҙәтәгесә; **днём он обы́чно рабо́тает** көндөҙ ул ғәҙәттә эшләй

**ОБЫ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*постоянный, привычный*) ғәҙәти, ғәҙәттәге, ҡәҙимге, һәр ваҡыттағы; **обы́чный слу́чай** ғәҙәти хәл; **обы́чный поря́док** һәр ваҡыттағы тәртип; **на обы́чном ме́сте** ғәҙәттәге урында **2.** (*заурядный*) ябай, уртаса, ғәҙәти; **дом был обы́чный** өй уртаса ине; **са́мая обы́чная де́вочка** иң ябай ҡыҙ ♦ **обы́чное пра́во** йола буйынса килгән хоҡуҡ, йола хоҡуғы

**ОБЮРОКРА́ТИТЬСЯ** *сов.* бюрократлашыу, бюрократҡа әйләнеү

**ОБЯ́ЗАННОСТЬ** *ж* бурыс, вазифа, йөкләмә; **права́ и обя́занности** хоҡуҡтар һәм вазифалар; **служе́бные обя́занности** вазифа (вазифа буйынса) бурыстар(ы); **исполня́ющий обя́занности дире́ктора** директор вазифаһын башҡарыусы; **ме́лкие обя́занности** ябай бурыстар ♦ **вмени́ть в обя́занность** бурыс итеп ҡуйыу, йөкмәтеү

**ОБЯ́ЗАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *с неопр.* тейеш, тейешле; **я обя́зан помо́чь вам** мин һеҙгә ярҙам итергә тейеш(мен) **2.** *кому-чему, чем* бурыслы; **я вам о́чень обя́зан** мин һеҙгә бик бурыслымын; **быть ве́чно обя́занным** *кому-л. берәйһенә* ғүмер буйы бурыслы булыу

**ОБЯЗА́ТЕЛЬНО** *нареч.* һис һүҙһеҙ, мотлаҡ, мотлаҡан (һис шикһеҙ); **обяза́тельно сде́лаю** мотлаҡ эшләрмен; **обяза́тельно приходи́те** мотлаҡ килегеҙ

**ОБЯЗА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* мәжбүрилек, һис һүҙһеҙ тейешлек, кәрәклек

**ОБЯЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** мотлаҡ, мәжбүри; **обяза́тельное усло́вие** мотлаҡ шарт; **в обяза́тельном поря́дке** мотлаҡ рәүештә **2.** ярҙам итергә әҙер, ярҙамсыл, һүҙендә тора торған; **обяза́тельный челове́к** ярҙамсыл кеше

**ОБЯЗА́ТЕЛЬСТВО** *с* **1.** йөкләмә, бурыс, вәғәҙә; **взять обяза́тельство** йөкләмә алыу **2.** *эк.* (*денежный заёмный документ*) йөкләмә (*облигацияның бер төрө*)

**ОБЯЗА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** йөкмәтеү, йөкләтеү, мәжбүр (талап) итеү; **обяза́ть вы́ехать в срок** ваҡытында сығып китеүҙе талап итеү **2.** (*вызвать чувство признательности, благодарности*) ҡәнәғәтләндереү, хөрмәт тойғоһо тыуҙырыу, бурыслы иттереү; **э́тим вы меня́ о́чень обя́жете** бының менән һеҙ мине бик бурыслы иттерәһегеҙ

**ОБЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* йөкләмә (өҫкә) алыу, һүҙ биреү; **обяза́лся прие́хать** килергә һүҙ бирҙе; **обяза́ться досро́чно вы́полнить рабо́ту** эште ваҡытынан алда эшләп бөтөрөргә йөкләмә алыу

**ОБЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **обяза́ть**

**ОБЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **обяза́ться**

**ОВА́Л** *м* (*фигура*) овал, оҙонса түңәрәк; (*о лице*) һыҙат, һыҙатланыш; **ова́л лица́** йөҙҙөң һыҙатланышы

**ОВА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое овал ...ы, оҙонса, оҙонса түңәрәк; **ова́льный стол** оҙонса түңәрәк өҫтәл; **ова́льное блю́до** оҙонса тәрилкә

**ОВА́ЦИЯ** *ж* алҡыш, көслө ҡул сабыу; **бу́рные ова́ции** көслө алҡыштар; **встре́тить ова́цией** алҡыш менән ҡаршы алыу

**ОВДОВЕ́ТЬ** *сов.* тол ҡалыу

**О́ВЕН** *м*; *астр.* Ҡуҙы (*йондоҙлоҡ*)

**ОВЁС** *м* һоло; **се́ять овёс** һоло сәсеү

**ОВЕ́ЧИЙ,** -ья, -ье һарыҡ ...ы; **ове́чья шерсть** һарыҡ йөнө; **ове́чий сыр** һарыҡ һөтөнән яһалған сыр ♦ **волк в ове́чьей шку́ре** һарыҡ тиреһенә төрөнгән бүре

**ОВЕ́ЧКА** *ж* **1.** *уменьш.-ласк. от* **овца́** **2.** *перен.* йыуаш кеше, йыуаш; **прики́нуться ове́чкой** йыуаш булып ҡыланыу

**ОВЕЩЕСТВИ́ТЬ** *сов. что*; *книжн.* матдилаштырыу, матди хәлгә килтереү; **овеществи́ть труд в това́ре** эште тауарҙа матдилаштырыу

**ОВЕЩЕСТВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *книжн.* матдилашыу, матди хәлгә килеү

**ОВЕЩЕСТВЛЕ́НИЕ** *с см.* **овеществи́ть, овеществи́ться**

**ОВЕЩЕСТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **овеществи́ть**

**ОВЕЩЕСТВЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **овеществи́ться**

**ОВЕ́ЯТЬ** *сов. кого-что, чем* **1.** (*обдать струёй воздуха, ветра и т.д.*) бәреү, иҫеү, бәреп (иҫеп) ебәреү; **ове́яло холо́дным ве́тром** һалҡын ел иҫеп ебәрҙе **2.** *перен.* күмеү, солғау; **ове́ять сла́вой** данға күмеү

**ОВИ́Н** *м* әүен

**ОВЛАДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **овладе́ть**

**ОВЛАДЕ́НИЕ** *с см.* **овладе́ть**; **овладе́ние те́хникой** техникаға эйә булыу

**ОВЛАДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кем-чем* алыу, ҡулға төшөрөү, баҫып алыу, эйә булыу; **овладе́ть го́родом** ҡаланы баҫып алыу; **овладе́ть иму́ществом** милеккә эйә булыу **2.** *кем-чем* буйһондороу, ҡулға алыу, үҙенә ҡаратыу; **овладе́ть ло́шадью** атты үҙенә буйһондороу; **овладе́ть внима́нием слу́шателей** тыңлаусыларҙы үҙенә ҡаратыу **3.** *кем* солғап (биләп) алыу, батыу, баҫыу, сумыу; **им овладе́ла ра́дость** уны ҡыуаныс солғап алды **4.** *чем* үҙләштереү, эйә булыу; **овладе́ть зна́ниями** белемгә эйә булыу; **овладе́ть но́вой специа́льностью** яңы һөнәргә эйә булыу ♦ **овладе́ть собо́й** үҙеңде ҡулға алыу

**О́ВОД** *м* күгәүен; (*бычий*) уҡра; (*лошадиный*) бөгәләк, бөгәлсән; (*овечий*) рәшә

**ОВОЩЕВО́Д** *м* йәшелсәсе, йәшелсә үҫтереүсе

**ОВОЩЕВО́ДСТВО** *с* йәшелсәселек

**ОВОЩЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое йәшелсәселек ...ы; **овощево́дческое хозя́йство** йәшелсәселек хужалығы

**ОВОЩЕМО́ЙКА** *ж* йәшелсә йыуғыс

**ОВОЩЕРЕ́ЗКА** *ж* йәшелсә турағыс

**ОВОЩЕХРАНИ́ЛИЩЕ** *с* йәшелсә һаҡлағыс (һаҡлау урыны)

**О́ВОЩИ** *мн.* (*ед.* **о́вощ** *м*) йәшелсә; **ра́нние о́вощи** иртә (өлгөрә торған) йәшелсәләр; **суп из овоще́й** йәшелсә ашы; **све́жие о́вощи** яңы йәшелсә ♦ **вся́кому о́вощу своё вре́мя** һәр эштең үҙ ваҡыты бар

**ОВОЩНО́Й,** -ая, -ое йәшелсә ...ы; **овощно́й магази́н** йәшелсә магазины; **овощны́е консе́рвы** йәшелсә консервалары

**ОВРА́Г** *м* йырын, йырынты, соҡор; **глубо́кий овра́г** тәрән соҡор; **дно овра́га** йырын төбө

**ОВРА́ЖИСТЫЙ,** -ая, -ое йырынлы, йырынтылы, соҡор-саҡырлы; **овра́жистая ме́стность** соҡор-саҡырлы урын

**ОВСЮ́Г** *м*; ҡара һоло

**ОВСЯ́НИЦА** *ж* һолобаш (*үлән*)

**ОВСЯ́НКА I** *ж*; *разг.* **1.** (*крупа*) һоло ярмаһы **2.** (*каша*) һоло бутҡаһы

**ОВСЯ́НКА II** *ж* (*птица*) һоло турғайы; **камышо́вая овся́нка** ҡамыш турғайы; **овся́нка лугова́я** һылыуҡас турғай

**ОВСЯНО́Й** и **ОВСЯ́НЫЙ,** -ая, -ое һоло ...ы; **овсяно́е по́ле** һоло баҫыуы

**ОВЦА́** *ж* һарыҡ; (*с момента прекращения сосания до второго окота*) бәрән һарыҡ; (*после второго окота до третьего*) шешәк һарыҡ; (*пропустившая очередной окот*) тыу һарыҡ; **тонкору́нная овца́** нәҙек йөнлө һарыҡ; **курдю́чная овца́** ҡуй, ҡуй һарығы; **кара́кулевая овца́** ҡаракүл һарығы

**ОВЦЕБЫ́К** *м* һарыҡ-үгеҙ, мускуслы үгеҙ (*Американың Арктика өлөшөндә һәм Гренландияла йәшәй торған, үгеҙгә лә, һарыҡ тәкәһенә лә оҡшаған ҡуш тояҡлы, һалбыр йөнлө, имсәкле хайуан*)

**ОВЦЕВО́Д** *м* һарыҡсылыҡ белгесе

**ОВЦЕВО́ДСТВО** *с* һарыҡсылыҡ; **занима́ться овцево́дством** һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү

**ОВЦЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое һарыҡсылыҡ ...ы; **овцево́дческий совхо́з** һарыҡсылыҡ совхозы

**ОВЦЕМА́ТКА** *ж*; *разг.* инә һарыҡ

**ОВЦЕФЕ́РМА** *ж* һарыҡ фермаһы

**ОВЧА́Р** *м* һарыҡ ҡараусы

**ОВЧА́РКА** *ж* овчарка (*эт тоҡомо*)

**ОВЧА́РНЯ** *ж* һарыҡ аҙбары

**ОВЧИ́НА** *ж* иләнгән һарыҡ тиреһе

**ОВЧИ́НКА** *ж*; *уменьш. от* **овчи́на ♦ овчи́нка вы́делки не сто́ит** бер тинлек ҡуян — ун тинлек зыян, эшләгән ялы ла юҡ; **не́бо с овчи́нку (в овчи́нку) показа́лось** *см.* **не́бо**

**ОВЧИ́ННЫЙ,** -ая, -ое һарыҡ тиреһенән тегелгән; **овчи́нный тулу́п** һарыҡ тиреһенән тегелгән толоп

**ОГА́РОК** *м* май шәм төпсөгө (ҡалдығы)

**ОГИБА́ТЬ** *несов. см.* **обогну́ть**

**ОГЛАВЛЕ́НИЕ** *с* йөкмәтке, бүлектәр исемлеге; **оглавле́ние сбо́рника** йыйынтыҡтың йөкмәткеһе

**ОГЛА́ДИТЬ** *сов.* һыйпау, һыйпап алыу; **огла́дить ко́шку** бесәйҙе һыйпап алыу

**ОГЛАСИ́ТЬ** *сов. что* **1.** иғлан итеү, уҡыу, уҡып ишеттереү, халыҡҡа белдереү; **огласи́ть реше́ние** ҡарарҙы уҡыу; **огласи́ть прика́з** бойороҡто халыҡҡа белдереү **2.** яңғыратыу; **огласи́ть лес кри́ками** ҡысҡырып урман яңғыратыу **3.** *уст.* (*разгласить*) фаш итеү, асыу, асып һалыу, фашлау; **огласи́ть чужу́ю та́йну** кеше серен асыу

**ОГЛАСИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яңғырау, яңғырап тороу; **поля́на огласи́лась пе́снями** аҡлан йырҙарҙан яңғырап торҙо **2.** *уст.* (*разгласиться*) асылыу, фаш ителеү; **та́йна огласи́лась** сер асылды

**ОГЛА́СКА** *ж* фаш булыу (ителеү), фашланыу; **де́ло получи́ло огла́ску** эш фашланды; **избежа́ть огла́ски** фаш ителмәү (ителмәй ҡалыу)

**ОГЛАША́ТЬ** *несов. см.* **огласи́ть**

**ОГЛАША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **огласи́ться** **2.** *страд. от* **оглаша́ть**

**ОГЛАШЕ́НИЕ** *с см.* **огласи́ть** 1, 3

**ОГЛО́БЛЯ** *ж* тәртә; **огло́бли теле́ги** арба тәртәләре

**ОГЛО́ХНУТЬ** *сов.* һаңғырауланыу

**ОГЛУША́ТЬ** *несов. см.* **оглуши́ть**

**ОГЛУШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое ҡолаҡ тондорғос (яргыс), шаңғытҡыс; **оглуши́тельный взрыв** ҡолаҡ тондорғос шартлау

**ОГЛУШИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** һаңғырауландырыу, ҡолаҡ тондороу; **взрыв оглуши́л его́** шартлау ҡолағын тондорҙо **2.** (*лишить сознания*) (башына һуғып) иҫәңгерәтеү, миңрәтеү, һуштан яҙҙырыу, шаңғытыу; **оглуши́ть дуби́нкой** суҡмар менән иҫәңгерәтә һуғыу; **оглуши́ть ры́бу** балыҡ шаңғытыу **3.** *перен., разг.* (*ошеломить*) хайран (аптырашта) ҡалдырыу; **оглуши́ть быстрото́й** тиҙлек менән хайран ҡалдырыу; **оглуши́ть изве́стием** (яңылыҡ) хәбәр менән аптырашта ҡалдырыу

**ОГЛЯДЕ́ТЬ** *сов. кого-что* күҙ йөрөтөп сығыу, ҡарап (байҡап) сығыу; **огляде́ть ко́мнату** бүлмәгә күҙ йөрөтөп сығыу

**ОГЛЯДЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡараныу, ҡаранып алыу, ҡараштырыу; **огляде́ться вокру́г** тирә-яҡҡа ҡараныу; **огляде́ться в зе́ркало** үҙеңде көҙгөнән ҡарап алыу **2.** *разг.* (*привыкнуть к темноте*) (ҡараңғыға) күҙ күнегеү (өйрәнеү) **3.** *перен.* (*освоиться*) күнегеү, өйрәнеү, күнегеп (өйрәнеп) китеү; **огляде́ться в но́вом коллекти́ве** яңы коллективҡа күнегеп китеү

**ОГЛЯ́ДКА** *ж см.* **огляну́ться** — **огля́дываться ♦ без огля́дки**: 1) алды-артты ҡарамай (ҡарап тормай), артҡа боролоп ҡарамайынса; **бежа́ть без огля́дки** артҡа боролоп ҡарамай сабыу; 2) абайламайынса, алды-артты ҡарамай (ҡарап тормай); 3) уйламай-нитмәй, уйлап тормай; **ве́рить без огля́дки** уйламай-нитмәй ышаныу; **с огля́дкой** һаҡлыҡ менән, абайлап, алды-артты ҡарап; **де́йствовать с огля́дкой** һаҡлыҡ менән эш итеү

**ОГЛЯ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **огляде́ть**

**ОГЛЯ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **огляде́ться** 1, **оглянуться** **2.** *на кого-что* и *без доп.*; *перен., разг.* абай (һаҡ) булыу, берәйһенә ҡарап эш итеү

**ОГЛЯНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *прям., перен.* (*посмотреть назад*) әйләнеп (боролоп) ҡарау; **он огляну́лся** ул әйләнеп ҡараны **2.** *разг.* (*посмотреть вокруг себя*) тирә-яҡҡа ҡараныу, ҡаранып алыу **♦ не успе́ешь (не успе́л) огляну́ться, как** күҙ асып йомғансы

**ОГНЕ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ут" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **огнезащи́тный** уттан һаҡлай торған

**ОГНЁВКА** *ж* **1.** (*бабочка*) күбәләк; **огнёвка капу́стная** кәбеҫтә күбәләге; **огнёвка зернова́я** орлоҡ күбәләге **2.** (*лисица*) ҡыҙыл төлкө

**ОГНЕВО́Й,** -ая, -ое **1.** утта, ут менән; **огнева́я су́шка** утта киптереү **2.** ут төҫлө, ялҡын төҫөндәге; **огнево́й флаг** ут төҫлө флаг; **огневы́е рябі́ны** ялҡын төҫөндәге миләштәр **3.** ут ...ы, атыу ...ы; **огнева́я ата́ка** ут һөжүме; **огнева́я подгото́вка** атыу әҙерлеге ♦ **огнева́я пози́ция** атыу позицияһы; **огневы́е сре́дства** атыу ҡоралдары; **огнева́я то́чка** ут нөктәһе

**ОГНЕДЫ́ШАЩИЙ,** -ая, -ее ут сәскән (сәсрәткән), ут бөркөп торған; **огнеды́шащий драко́н** ут бөркөп торған аждаһа

**ОГНЕМЁТ** *м*; *воен.* огнемёт, ут асҡыс (бөрккөс)

**О́ГНЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** ут ...ы, ялҡын ...ы; **о́гненный столб** ялҡын бағанаһы; **о́гненные языки́** ялҡын телдәре **2.** ут төҫлө (төҫөндәге), ут ҡыҙыл, ҡып-ҡыҙыл; **о́гненное не́бо** күк йөҙө ҡып-ҡыҙыл; **о́гненный цвето́к** ҡып-ҡыҙыл сәскә **3.** ялҡынлы, дәртле, янып торған; **о́гненные глаза́** ялҡынлы күҙҙәр; **о́гненное воображе́ние** дәртле хыял; **о́гненные слова́** ялҡынлы һүҙҙәр

**ОГНЕОПА́СНЫЙ,** -ая, -ое тиҙ ҡабыныусан, янғындан (уттан) ҡурҡыныслы; **огнеопа́сная жи́дкость** тиҙ ҡабыныусан шыйыҡса

**ОГНЕПОКЛО́ННИК** *м* утҡа табыныусы (*кеше*)

**ОГНЕПОКЛО́ННИЧЕСТВО** и **ОГНЕПОКЛО́НСТВО** *с* утҡа табыныу

**ОГНЕПРИПА́СЫ** *только мн.* атыу кәрәк-ярағы (*туп, патрон, бомба һ.б.*)

**ОГНЕСТО́ЙКИЙ,** -ая, -ое утҡа сыҙамлы, янмай торған; **огнесто́йкие сооруже́ния** утҡа сыҙамлы ҡоролмалар

**ОГНЕСТО́ЙКОСТЬ** *ж* утҡа сыҙамлылыҡ, утҡа сыҙамлы булыу, утҡа янмау (бирешмәү)

**ОГНЕСТРЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** атыу ...ы, ата торған; **огнестре́льное ору́жие** атыу ҡоралы **2.** пуля ...ы, снаряд ярсығы ...ы; **огнестре́льная ра́на** пуля (снаряд ярсығы) яраһы

**ОГНЕТУШИ́ТЕЛЬ** *м* ут һүндергес

**ОГНЕУПО́РНОСТЬ** *ж* утҡа сыҙамлылыҡ, утҡа сыҙамлы булыу

**ОГНЕУПО́РНЫЙ,** -ая, -ое утҡа сыҙамлы; **огнеупо́рный кирпи́ч** утҡа сыҙамлы кирбес

**ОГНЕУПО́РЫ** *только мн.* утҡа сыҙамлы материалдар

**ОГНИ́ВО** *с* саҡматаш, саҡмаҡорос

**ОГНИ́ЩЕ** *с* **1.** ут (усаҡ) урыны **2.** яныҡ, көйөк (*урманын ҡырҡып, яндырып, һөрөүгә билдәләнгән урын*)

**ОГО́** и **О-ГО-ГО́** *межд.* (*выражает удивление, восхищение, одобрение и т.д.*) ай-һай, һай-һай, әй, әһә; **ого́, как ты вы́рос** һай-һай, ҡай-һылай үҫкәнһең

**ОГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **оговори́ть**

**ОГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оговори́ться** **2.** *страд. от* **огова́ривать**

**ОГОВО́Р** *м*; *разг.* яла

**ОГОВОРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *разг.* яла яғыу, кеше өҫтөнән һөйләү; **оговори́ть на допро́се** допроста кеше өҫтөнән һөйләү **2.** *что* алдан һөйләшеп ҡуйыу; **оговори́ть срок рабо́ты** эш срогын алдан һөйләшеп ҡуйыу **3.** *что* (*сделать оговорку*) аңлатма биреү, иҫкәрмә яһау; **оговори́ть своё несогла́сие** риза булмауыңа аңлатма биреү

**ОГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** иҫкәртеп (әйтеп) китеү; **я до́лжен оговори́ться** мин иҫкәртеп китергә тейешмен **2.** (*ошибиться в речи*) яңылыш әйтеп ҡуйыу (ебәреү), яңылыш һүҙ ысҡындырыу; **оговори́ться второпя́х** ашығыслыҡ менән яңылыш әйтеп ҡуйыу

**ОГОВО́РКА** *ж* **1.** (*замечание к сказанному*) төҙәтмә, өҫтәмә; **с огово́рками** (ҡайһы бер) төҙәтмәләр менән **2.** (*обмолвка*) яңылыш (әйтелгән) һүҙ, һүҙ хатаһы; **случа́йная огово́рка** осраҡлы һүҙ хатаһы

**ОГОЛЕ́НИЕ** *с см.* **оголи́ть**, **оголи́ться**

**ОГОЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **оголи́ть** **2.** *прил.* яланғас, шәрә; **оголённая голова́** яланғас баш **3.** *прил.* яланғас, ҡола, япраҡһыҙ, үләнһеҙ; **оголённое по́ле** ҡола ялан; **оголённые дере́вья** яланғас ағастар **4.** *прил.* яланғас, тышһыҙ, тышы һыҙырып алынған; **оголённый про́вод** яланғас сым

**ОГОЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* асыу; **оголи́ть пле́чи** иңбаштарҙы асыу **2.** *что* яланғасландырыу, яланғас (шәрә) ҡалдырыу; **ве́тер оголи́л дере́вья** ел ағастарҙы яланғасландырҙы **3.** *что* яланғаслау, ҡапһыҙ (тышһыҙ, асыҡ) ҡалдырыу; **оголи́ть про́вод** сымды асыҡ ҡалдырыу **4.** *что* (*вынуть из ножен*) һурыу, һурып алыу **5.** *что* асыу, асыҡ (һаҡһыҙ) ҡалдырыу; **оголи́ть фланг** флангыны асыҡ ҡалдырыу

**ОГОЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*обнажиться*) асылыу, асыҡ (яланғас) ҡалыу **2.** яланғасланыу (шәрә ҡалыу); **дере́вья уже́ оголи́лись** ағастар яланғасланған инде **3.** (*стать видимым*) яланғасланыу, тышһыҙ (асыҡ) ҡалыу, асылыу; **про́вод оголи́лся** сым асыҡ ҡалған **4.** (*стать открытым для врага*) асыҡ (һаҡһыҙ) ҡалыу; **ли́ния фро́нта оголи́лась** фронт һыҙығы асыҡ ҡалды

**ОГОЛТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* шашынған, ҡоторонған; **оголте́лый враг** ҡоторонған дошман

**ОГОЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **оголи́ть**

**ОГОЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оголи́ться** **2.** *страд. от* **оголя́ть**

**ОГОНЁК** *м* **1.** *уменьш.-ласк. от* **ого́нь** **2.** *перен.* дәрт, сатҡы; **рабо́тать с огоньќом** дәрт менән эшләү **3.** (*свет, пятно света, блеск глаз*) ут яҡтыһы; **не ви́дно ни огонька́** бер ут яҡтыһы ла күренмәй ♦ **зайти́ (забежа́ть) на огонёк** үтеп барышлай кереү, тәҙрәнән ут күреп кереү

**ОГО́НЬ** *м*; *в разн. знач.* ут; **ого́нь в печи́** мейестәге ут; **развести́ ого́нь** ут яндырыу (ҡабы-

ҙыу); **ого́нь любви́** ғишыҡ уты; **огни́ го́рода** ҡала уттары; **откры́ть ого́нь** ут асыу; **ли́ния огня́** ут һыҙығы; **не челове́к, а ого́нь** торғаны менән ут кеше инде ♦ **в огне́**: 1) янып барыу; **голова́ в огне́** башым янып бара; 2) һуғыш, ут (алыш) эсендә; **быть це́лый день в огне́** көнө буйы ут эсендә булыу; **в ого́нь и во́ду (гото́в, пойду́ и т.д.)** бөтәһенә лә әҙер (булыу); **из огня́ да в по́лымя** уттан алып һыуға ташлау; бер бәләнән ҡотолоп, икенсеһенә эләгеү; **ме́жду двух огне́й** ике ут араһында; **огнём и мечо́м** ҡырып-үлтереп, ут һәм ҡылыс менән; **боя́ться как огня́** уттан ҡурҡҡандай ҡурҡыу; **игра́ть (шути́ть) с огнём** ут менән уйнау; **пройти́ ого́нь и во́ду (и ме́дные тру́бы)** ут-һыу кисеү, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыу

**ОГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **огороди́ть**

**ОГОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **огороди́ться 2.** *страд. от* **огора́живать**

**ОГОРО́Д** *м* йәшелсә баҡсаһы

**ОГОРОДИ́ТЬ** *сов.* кәртәләү, ҡоймалау, ихаталау, кәртәләп (ҡоймалап) алыу, кәртә (ҡойма) тотоу; **огороди́ть уча́сток** участканы кәртәләп алыу

**ОГОРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* кәртәләнеү, ҡоймаланыу, ихаталаныу, кәртә (ҡойма) тотолоу

**ОГОРО́ДНИК** *м* йәшелсәсе, йәшелсә баҡсаһында эшләүсе

**ОГОРО́ДНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* йәшелсә үҫтереү, йәшелсәселек менән шөғөлләнеү

**ОГОРО́ДНИЧЕСТВО** *с* йәшелсә үҫтереү, йәшелсәселек

**ОГОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое баҡса ...ы, йәшелсә баҡсаһы ...ы; **огоро́дные расте́ния** йәшелсә баҡсаһы үҫемлектәре

**ОГОРО́ШИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* аптыраштa ҡалдырыу, шаҡ ҡатырыу, аптыратыу; **огоро́шить вопро́сом** һорау биреп аптыратыу

**ОГОРЧА́ТЬ** *несов. см.* **огорчи́ть**

**ОГОРЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **огорчи́ться**

**ОГОРЧЕ́НИЕ** *с* кәйеф китеү (ҡырылыу), көйөнөс, йән әсеү, әсенеү, борсолоу; **пережи́ть мно́го огорче́ний** күп кенә борсолоуҙар кисереү

**ОГОРЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **огорчи́ть 2.** *прил.* әсенгән, борсоулы; **огорчённый вид** борсоулы йөҙ

**ОГОРЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое әсендерә (борсолдора) торған, борсоулы, көйөндөргөс; **огорчи́тельное изве́стие** көйөндөргөс хәбәр

**ОГОРЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* күңелһеҙләндереү, кәйефте ҡырыу, көйөндөрөү, әсендереү, йән әсетеү; **огорчи́ть свои́м поведе́нием** *кого-л. берәйһенең* үҙеңдең тәртибең менән кәйефен ҡырыу

**ОГОРЧИ́ТЬСЯ** *сов.* әсенеү, йән әсеү, борсолоу, көйөнөү; **не огорча́йся** әсенмә, көйөнмә

**ОГРА́БИТЬ** *сов.* талау, талап (тартып) алыу

**ОГРАБЛЕ́НИЕ** *с см.* **огра́бить**

**ОГРА́ДА** *ж* ҡамау, кәртә, ҡойма; **ка́менная огра́да** таш ҡойма

**ОГРАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* кәртәләү, ҡоймалау, кәртә (ҡойма) тотоу **2.** *кого-что*; *перен.* ҡурсалау, ҡурсыу, әрсәләү; **огради́ть от напа́док** бәйләнеүҙәрҙән әрсәләү; **огради́ть от волне́ний** *кого-л. берәйһен* тулҡынланыуҙан һаҡлау

**ОГРАЖДА́ТЬ** *несов. см.* **огради́ть**

**ОГРАЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **огради́ть** – **огражда́ть 2.** (*ограда*) ҡамау, ҡойма, кәртә

**ОГРА́НИВАТЬ** *несов. см.* **ограни́ть**

**ОГРАНИ́ТЬ** *сов. что* тирәсләү, ҡырлау, ҡыр яһау; **ограни́ть ва́зу** вазаны тирәсләү

**ОГРАНИЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ограни́чить 2.** сикләү, сик ҡуйыу, сикләмә; **отме́на ограниче́ний** сикләүҙәрҙе бөтөрөү

**ОГРАНИ́ЧЕННОСТЬ** *ж* **1.** сикләнгәнлек, сикле (аҙ) булыу; **ограни́ченность де́нежных средств** аҡсаның аҙ булыуы **2.** *перен.* тарлыҡ, тар ҡарашлы булыу, һайлыҡ; **ограни́ченность ума́** аҡыл һайлығы

**ОГРАНИ́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ограни́чить 2.** *прил.* сикләнгән, сикле; **ограни́ченные возмо́жности** сикле мөмкинлектәр; **ограни́ченный срок** аҙ срок **3.** *прил.*; *перен.* тар (һай) ҡарашлы; **ограни́ченный челове́к** тар ҡарашлы кеше

**ОГРАНИ́ЧИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **ограни́чить 2.** *что* (*являться пределом*) сикләү, сик булып тороу

**ОГРАНИ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ограни́читься 2.** *страд. от* **ограни́чивать**

**ОГРАНИЧИ́ТЕЛЬ** *м* сикләгес; **ограничи́тель то́ка** ток сикләгесе

**ОГРАНИЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сикләү (се), сикләй торған, сик ҡуя торған; **ограничи́тельные ме́ры** сикләү саралары

**ОГРАНИ́ЧИТЬ** *сов. кого-что* сикләү, тыйыу, сик ҡуйыу; **ограни́чить себя́** *в чём-л. берәй нәмәлә* үҙеңде сикләү

**ОГРАНИ́ЧИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*удовольствоваться чем-л.*) ҡәнәғәтләнеү **2.** (*свестись к чему-л.*) ҡайтып ҡалыу, бөтөү, сикләнеү; **ограни́читься вы́говором** шелтә биреү менән сикләнеү

**ОГРЕ́Х** *м* **1.** сей ҡалдырылған (эшкәртелмәгән) урын; **паха́ть без огре́хов** сей ҡалдырмай һөрөү **2.** *прост.* (*недоделка*) сей эш, сейле-бешле эш

**ОГРО́МНЫЙ,** -ая, -ое бик (ғәйәт, сикһеҙ) ҙур; **огро́мное зда́ние** бик ҙур бина; **огро́мное влия́ние** ғәйәт ҙур йоғонто

**ОГРУБЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое тупаҫланған, ҡытыршыланған; **огрубе́лые ру́ки** ҡытыршыланған ҡулдар

**ОГРУБЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡатып китеү, шыраулаnыу, ҡытыршыланыу; **ко́жа огрубе́ла** тире ҡытыршыланды **2.** (*о человеке*) тупаҫланыу

**ОГРЫЗА́ТЬСЯ** *несов. см.* **огрызну́ться**

**ОГРЫЗНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о собаке*) ырылдап ҡуйыу (алыу) **2.** *перен.*, *разг.* (*грубо ответить*) ырылдап ҡуйыу, тупаҫ яуап биреү

**ОГРЫ́ЗОК** *м*; *разг.* **1.** ҡалдыҡ, кимерек; **огры́зок я́блока** алма ҡалдығы **2.** киҫәк, төпсөк; **огры́зок карандаша́** ҡәләм төпсөгө

**ОГУ́ЗОК** *м* **1.** (*мясо*) һум ит, бот ите **2.** (*шкура*) арт һандың тиреһе

**ОГУ́ЛОМ** *нареч.*; *разг.* тикшермәй-нитмәй, (бөтәһен) бергә, бер юлы; **вини́ть всех огу́лом** барыһын бергә ғәйепләү

**ОГУ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** нигеҙһеҙ, дәлилһеҙ; **огу́льное обвине́ние** дәлилһеҙ ғәйепләү **2.** барыһына бер төрлө; **огу́льная характери́стика всего́ крестья́нства** крәҫтиәндәрҙең барыһына бер төрлө характеристика

**ОГУРЕ́Ц** *м* ҡыяр

**ОГУРЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡыяр ...ы; **огуре́чные семена́** ҡыяр орлоғо; **огуре́чный рассо́л** ҡыяр тоҙламаһы

**О́ДА** *ж*; *лит.* мәҙхиә, маҡтау шиғыры

**ОДА́ЛЖИВАТЬ** *несов. см.* **одолжи́ть**

**ОДАЛИ́СКА** *ж* кәнизәк, һөйәркә

**ОДАРЁННОСТЬ** *ж* һәләтлелек, талантлылыҡ

**ОДАРЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **одари́ть** **2.** *прил.* һәләтле, талантлы; **одарённый поэ́т** һәләтле шағир

**ОДА́РИВАТЬ** *несов. см.* **одари́ть**

**ОДАРИ́ТЬ** *сов. кого-что, чем* **1.** бүләкләү, бүләк биреү; **одари́ть дете́й игру́шками** балаларҙы уйынсыҡтар менән бүләкләү **2.** *перен.* биреү, күп итеп биреү; **приро́да одари́ла его́ умо́м** тәбиғәт уға аҡыл биргән

**ОДАРЯ́ТЬ** *несов. см.* **одари́ть**

**ОДЕВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **оде́ть** **2.** *кого-что* кейендереү; **одева́ть ребёнка со вку́сом** баланы зауыҡ менән кейендереү

**ОДЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оде́ться** **2.** кейенеү, кейенә белеү, кейенеп йөрөү; **одева́ться про́сто** ябай (ғына) кейенеп йөрөү; **одева́ться с иго́лочки** уҡтан-суҡтан (зауыҡ менән) кейенеү; **уме́ть одева́ться** кейенә белеү **3.** *страд. от* **одева́ть**

**ОДЕ́ЖДА** *ж* **1.** кейем, кейем-һалым, өҫ-баш; **ве́рхняя оде́жда** өҫкө кейем; **ле́тняя оде́жда** йәйге кейем; **следи́ть за оде́ждой** өҫ-башты ҡарау; **обнови́ть оде́жду** өҫ-башты бөтәйтеү **2.** *спец.* (*покрытие, облицовка*) япма, ҡаплама

**ОДЁЖКА** *ж*; *разг., уменьш. от* **оде́жда** 1 ♦ **по одёжке протя́гивай но́жки** юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ

**ОДЕКОЛО́Н** *м* одеколон

**ОДЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что, чем* өлөш сығарыу, биреп (өләшеп) сығыу

**ОДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **одели́ть**

**ОДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **одёрнуть**

**ОДЕРЕВЕНЕ́ЛОСТЬ** *ж* ҡатып ҡалыу, ағас кеүек булыу, аяҡ-ҡул ойоу

**ОДЕРЕВЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ағас кеүек ҡатҡан, ҡатып ҡалған; **одеревене́лый сте́бель** ҡатып ҡалған һабаҡ; **одеревене́лые па́льцы** ағас кеүек ҡатҡан бармаҡтар

**ОДЕРЕВЕНЕ́ТЬ** *сов.* ағас кеүек ҡатыу, ҡатып ҡалыу, аяҡ-ҡул ойоу; **одеревене́ть от хо́лода** һыуыҡтан ҡатып ҡалыу

**ОДЕРЖА́ТЬ:** **одержа́ть верх** өҫкә сығыу, өҫтөнлөк алыу; **одержа́ть побе́ду** еңеү, еңеп сығыу

**ОДЕ́РЖИВАТЬ** *несов. см.* **одержа́ть**

**ОДЕРЖИ́МОСТЬ** *ж* мауығыу, ныҡ бирелгәнлек

**ОДЕРЖИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ныҡ (артыҡ) бирелгән; **одержи́мый стра́хом** ҡурҡыуға ныҡ бирелгән; **одержи́мый стра́стью к нау́ке** фәнгә мөкиббән бирелгән **2.** ныҡ бирелеүсән, үтә мауығыусан; **одержи́мый челове́к** үтә мауығыусан кеше **3.** *в знач. сущ.* **одержи́мый** *м* и **одержи́мая** *ж* аҡылдан шашҡан кеше

**ОДЁРНУТЬ** *сов.* **1.** *что* тартып ҡуйыу (төҙәтеү, рәтләү); **одёрнуть фа́ртук** алъяпҡысты тартып төҙәтеү **2.** *кого*; *перен., разг.* тыйыу, туҡтатыу; **одёрнуть выступа́ющего** сығыш яһаусыны тыйыу

**ОДЕ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **оде́ть** **2.** *прил.* кейенгән, кейенгән килеш, кейемле; **хорошо́ оде́тый** яҡшы кейенгән; **он лежа́л оде́тый** ул кейенгән килеш ята ине

**ОДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* кейендереү; **оде́ть ребёнка** баланы кейендереү **2.** *кого-что* өҫ-башты бөтәйтеү, кейендереү; **оде́ть всю семью́** бөтә ғаиләне кейендереү **3.** *что*; *перен.* (*покрыть*) ҡаплау, солғау, ҡаплап (солғап) алыу; **зима́ оде́ла поля́ сне́гом** ҡыш баҫыуҙарҙы ҡар менән ҡаплаған

**ОДЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кейенеү; **тепло́ оде́ться** йылы кейенеү **2.** (*приобрести одежду*) кейенеү, кейенеп алыу; **оде́ться по-челове́чески** кеше рәүешле кейенеп алыу **3.** *перен.* (*покрыться*) ҡапланыу, солғаныу, төрөнөү; **оде́ться ли́ствой** япраҡ менән ҡапланыу

**ОДЕЯ́ЛО** *с* юрған, одеял; **стёганое одея́ло** һырылған юрған

**ОДЕЯ́НИЕ** *с*; *уст., шутл. см.* **оде́жда** 1

**ОДИ́Н** *м* (одна *ж*, одно *с*) *числ.* **1.** (*число*) бер **2.** *в знач. прил.* (*без других, в отдельности*) бер үҙе, яңғыҙ; **он живёт оди́н** ул бер үҙе тора; **ребёнок оста́лся до́ма оди́н** бала өйҙә яңғыҙ ҡалды **3.** *в знач. прил.* (*только, исключительно*) бер, бер генә, ғына (генә), бары тик, фәҡәт; **в одно́м пла́тье** күлдәксән генә; **одна́ отра́да** торғаны бер ҡыуаныс; **в ва́зе одни́ я́блоки** вазала бары тик алмалар ғына; **меня́ одно́ беспоко́ит** мине фәҡәт бер нәмә борсой **4.** *в знач. прил.* (*тот же самый, одинаковый, целостный, единый*) бер, бер үк, шул уҡ; **в оди́н и то́т же час** бер үк сәғәттә; **они́ о́ба одного́ во́зраста** улар икеһе лә бер үк йәштә; **каза́ться одни́м существо́м** бер үк зат булып күренеү **5.** *в знач. мест.* (*какой-л. в ряду сходных — в сочетании с*

*предлогом “из”)* бер, береһе; **оди́н из них** уларҙың береһе; **оди́н из прису́тствующих** булғандарҙың береһе **6.** *в знач. мест. (какой-то, некий)* берәйһе, берәү, бер кеше, кемдер; **в оди́н прекра́сный день** көндәрҙең береһендә; **ему́ сказа́л оди́н челове́к** уға кемдер әйткән **7.** *в знач. сущ.* **оди́н** *м*, **одна́** *ж* и **одно́** *с* береһе; **то оди́н, то друго́й** йә береһе, йә икенсеһе; **одно́ друго́му не меша́ет** береһе икенсеһенә ҡамасауламай ♦ **все до одного́** барыһы ла; **все как оди́н** бер кеше кеүек, барыһы ла бергә, бер күңелдән, бер тауыштан; **ни оди́н** һис кем, бер кеше лә; **одно́ и то же** бер үк нәмә; **оди́н за други́м** бер-бер артлы; **оди́н на оди́н** икәүҙән-икәү, икәү генә; **оди́н к одному́** береһенән-береһе (беренән-бере) яҡшыраҡ; **одно́ к одному́** бере өҫтөнә бере; **одно́ из двух** икенең бере; **оди́н-одинёшенек** япа-яңғыҙ; **оди́н-еди́нственный** берҙән-бер; **по одному́** бер-бер артлы, берәрләп; **ста́вить на одну́ до́ску** *с кем* тиң һанау (күреү), бер ҡалыпҡа һуғыу, бер дәрәжәгә (рәткә) ҡуйыу

**ОДИНА́КОВО** *нареч.* **1.** бер төрлө (төҫлө, тиң, иш), берҙәй; **оде́тые одина́ково** бер төрлө (бер иш) кейенгәндәр **2.** *(в равной мере)* бер үк дәрәжәлә (кимәлдә); **одина́ково гото́вый** бер үк дәрәжәлә әҙер

**ОДИНА́КОВЫЙ,** -ая, -ое бер төрлө (төҫлө, тигеҙ); **одина́ковые су́дьбы** бер төрлө яҙмыштар; **одина́кового разме́ра** бер тигеҙ (төрлө) ҙурлыҡта

**ОДИНА́РНЫЙ,** -ая, -ое бер ҡатлы, һыңар; *(о ткани)* бер инле; **одина́рная дверь** бер ҡатлы ишек; **одина́рная ра́ма** бер ҡатлы рам (тәҙрә); **одина́рные на́волочки** бер ҡатлы мендәр тышлығы

**ОДИ́ННАДЦАТЫЙ,** -ая, -ое *числ.* ун беренсе; **оди́ннадцатый час** сәғәт ун беренсе

**ОДИ́ННАДЦАТЬ** *числ.* ун бер; **оди́ннадцать челове́к** ун бер кеше

**ОДИНО́КИЙ,** -ая, -ое яңғыҙ; **одино́кий до́мик** яңғыҙ өй; **чу́вствовать себя́ одино́ким** үҙеңде яңғыҙ итеп тойоу, яңғыҙһыныу; **одино́кая жизнь** яңғыҙ тормош; **одино́кие прогу́лки по ле́су** урманда яңғыҙ йөрөү(ҙәр); **оста́ться одино́ким** яңғыҙ ҡалыу

**ОДИНО́ЧЕСТВО** *с* яңғыҙлыҡ; **привы́кнуть к одино́честву** яңғыҙлыҡҡа өйрәнеү

**ОДИНО́ЧКА 1.** *м* и *ж* яңғыҙ, яңғыҙ кеше; **куста́рь-одино́чка** яңғыҙ кустарь **2.** *м* и *ж*; *разг.* яңғыҙаҡ; **дом для одино́чек** яңғыҙаҡтар өсөн йорт **3.** *ж*; *разг. (тюремная камера)* одиночка, бер кешелек камера **4.** *ж (гоночная лодка)* бер кешелек ярыш кәмәһе ♦ **в одино́чку**: 1) *(поодиночке)* яңғыҙ, япа-яңғыҙ, бер үҙе; 2) *(собственными силами)* үҙ көсө менән

**ОДИНО́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** яңғыҙ; **одино́чный полёт** яңғыҙ осоу; **одино́чные пти́цы** яңғыҙ йәшәүсе ҡоштар **2.** *(предназначенный для одного)* бер кешелек; **одино́чный но́мер** бер кешелек номер **3.** *(отдельный)* айырым, берәм-һәрәм; **одино́чные вы́стрелы** берәм-һәрәм атыуҙар

**ОДИО́ЗНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* үтә насар (яман), әшәке, ҡапма-ҡаршылыҡлы; **одио́зная ли́чность** үтә насар кеше

**ОДИЧА́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ҡырағайланған, ҡырыҫланған; **одича́лая ко́шка** ҡырағайланған бесәй **2.** *(выражающий дикость)* ҡырағай, ҡырыҫ; **одича́лый вид** ҡырағай ҡиәфәт; **одича́лый взгляд** ҡырыҫ ҡараш

**ОДИЧА́ТЬ** *сов.* **1.** ҡырағайланыу, ҡырыҫланыу **2.** *перен. (отвыкнуть от людей)* ҡырағайланыу, кешенән биҙеү

**ОДНА́** *ж числ. см.* **оди́н**

**ОДНА́ЖДЫ** *нареч.* **1.** *(один раз)* бер тапҡыр (ҡат, ҡабат, мәртәбә, рәт); **то́лько одна́жды слы́шал** бер тапҡыр ғына ишетте **2.** *(как-то раз)* бер ваҡыт (мәл, саҡ), көндәрҙән бер көн; **одна́жды весно́й** бер саҡ яҙын, бер ваҡыт яҙғыһын; **одна́жды ве́чером** бер саҡ кискеһен

**ОДНА́КО 1.** *союз противит. (в значении союзов “но”, “да”)* ләкин, мәгәр, әммә; **уже́ стари́к, одна́ко бодр душо́й** инде ҡартайған, әммә күңеле йәш **2.** *в знач. вводн. сл. (тем не менее, всё же, всё-таки)* шулай ҙа, шулай булһа ла; **не забу́дьте обе́щанного, одна́ко** һеҙ шулай ҙа вәғәҙә иткән нәмәне онотмағыҙ **3.** *межд. (для выражения удивления, возмущения и т.п.)* ай-һай; **одна́ко! Хороши́ и вы!** ай-һай! Һеҙ үҙегеҙ ҙә шәп инде!

**ОДНО́** *с числ. см.* **оди́н**

**ОДНО...** *урыҫ телендәге ҡайһы бер ҡушма һүҙҙәрҙең “бер”, “һыңар” һәм “-даш/-таш” мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.,* **одноэта́жный** бер ҡатлы; **однокла́ссник** һабаҡташ; **однофами́лец** фамилиялаш

**ОДНОА́КТНЫЙ,** -ая, -ое бер актлы, бер пәрҙәле; **одноа́ктная пье́са** бер пәрҙәле пьеса

**ОДНОБО́КИЙ,** -ая, -ое бер яҡлы, бер яҡтан ғына сығып эшләнгән; **одноборкое сужде́ние** бер яҡлы фекер йөрөтөү

**ОДНОБО́КОСТЬ** *ж* бер яҡлылыҡ, бер яҡлы булыу

**ОДНОБО́РТНЫЙ,** -ая, -ое бер иҙеүле, бер яҡ ҡаптырмалы; **однобо́ртный пиджа́к** бер яҡ ҡаптырмалы пинжәк

**ОДНОВРЕМЕ́ННО** и **ОДНОВРЕ́МЕННО** *нареч.* бер (үк) ваҡытта, бер юлы; **нача́ть одновреме́нно** бер үк ваҡытта башлау

**ОДНОВРЕМЕ́ННОСТЬ** и **ОДНОВРЕ́МЕННОСТЬ** *ж* бер үк ваҡытта булыу; **одновреме́нность собы́тий** ваҡиғаларҙың бер үк ваҡытта булыуы

**ОДНОВРЕМЕ́ННЫЙ** и **ОДНОВРЕ́МЕННЫЙ,** -ая, -ое бер үк ваҡытта булған, бер үк ваҡыттағы

**ОДНОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое бер (һыңар) күҙле

**ОДНОГОДИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое (бер) йыллыҡ; **одногоди́чные ку́рсы** (бер) йыллыҡ курстар

**ОДНОГО́ДОК** *м* и **ОДНОГО́ДКА** *ж см.* **однолéток**

**ОДНОГОЛО́СИЕ** *с*; *муз.* бер тауышлы булыу, бер тауыштан тороу

**ОДНОГОЛО́СНЫЙ,** -ая, -ое *муз.* бер тауышлы, бер тауыштан торған

**ОДНОГО́РБЫЙ,** -ая, -ое бер үркәсле; **одного́рбый верблю́д** бер үркәсле дөйә, нар дөйә

**ОДНОДНЕ́ВКА** *ж* **1.** *зоол.* һыу мырҙары, бер көнлөк(тәр); **ба́бочка-однодне́вка** бер көнлөк күбәләк **2.** бер көнлөк, тиҙ иҫкереүсән (үтеүсән)

**ОДНОДНЕ́ВНЫЙ,** -ая, -ое бер көнлөк; **однодне́вная рабо́та** бер көнлөк эш; **однодне́вный дом о́тдыха** бер көнлөк ял йорто; **однодне́вный за́работок** бер көнлөк эш хаҡы

**ОДНОДО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *бот.* **1.** бер өлөшлө; **однодо́льные расте́ния** бер өлөшлө үҫемлектәр **2.** *в знач. сущ.* **однодо́льные** *мн.* бер өлөшлөләр

**ОДНОДО́МНЫЙ,** -ая, -ое *бот.* бер енесле; **однодо́мные расте́ния** бер енесле үҫемлектәр

**ОДНОЗВУ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое бер тауышлы; **однозву́чный колоко́льчик** бер тауышлы ҡыңғырау

**ОДНОЗНА́ЧНЫЙ I,** -ая, -ое *мат.* бер урынлы; **однозна́чное числó** бер урынлы һан

**ОДНОЗНА́ЧНЫЙ II,** -ая, -ое **1.** (*тождественный по смыслу*) мәғәнәләш, мәғәнәһе бер; **однозна́чные погово́рки** мәғәнәләш әйтемдәр **2.** (*с одним значением*) бер мәғәнәле; **однозна́чное сло́во** бер мәғәнәле һүҙ

**ОДНОИМЁННЫЙ,** -ая, -ое исемдәш, бер үк исемдәге, бер төрлө аталған, шул уҡ исемле; **одноимённая пло́щадь** бер үк исемдәге майҙан

**ОДНОКАЛИ́БЕРНЫЙ,** -ая, -ое бер үк калибрлы, калибрҙары бер булған; **однокали́берные ору́дия** бер үк калибрлы туптар

**ОДНОКА́ШНИК** *м*; *разг.* һабаҡташ

**ОДНОКЛА́ССНИК** *м* и **ОДНОКЛА́ССНИЦА** *ж* синыфташ, һабаҡташ, класташ

**ОДНОКЛЕ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое *биол.* бер күҙәнәкле; **однокле́точные органи́змы** бер күҙәнәкле организмдар

**ОДНОКЛУ́БНИК** *м*; *разг.* клубташ, бер үк клуб спортсыһы

**ОДНОКОВШО́ВЫЙ,** -ая, -ое *тех.* бер сүмесле; **одноковшо́вый экскава́тор** бер сүмесле экскаватор

**ОДНОКОЛЕ́ЙКА** *ж*; *разг.* бер колеялы тимер юл

**ОДНОКОЛЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое бер колеялы

**ОДНОКО́ЛКА** *ж* ҡуян арба

**ОДНОКО́МНАТНЫЙ,** -ая, -ое бер бүлмәле; **одноко́мнатная кварти́ра** бер бүлмәле фатир

**ОДНОКО́ННЫЙ,** -ая, -ое бер атлы, бер ат екмәле (егелә торған); **одноко́нный плуг** бер ат екмәле һабан

**ОДНОКОРЕННО́Й: однокоренно́е сло́во** *лингв.* тамырҙаш һүҙҙәр

**ОДНОКРА́ТНЫЙ,** -ая, -ое бер тапҡыр (ҡабат, рәт) булған; **однокра́тное посеще́ние больно́го** ауырыу янында бер тапҡыр булыу ♦ **однокра́тный глаго́л** *грам.* бер генә тапҡыр булған хәрәкәтте аңлатҡан ҡылым

**ОДНОКУ́РСНИК** *м* и **ОДНОКУ́РСНИЦА** *ж* курсташ

**ОДНОЛА́МПОВЫЙ,** -ая, -ое бер лампалы; **одноля́мповый радиоприёмник** бер лампалы радиоалғыс

**ОДНОЛЕМЕ́ШНЫЙ,** -ая, -ое бер төрәнле; **однолеме́шный плуг** бер төрәнле һабан

**ОДНОЛЕ́ТНИЙ,** -яя, -ее **1.** бер йәш (йәшлек)тәге; **одноле́тний ма́льчик** бер йәштәге малай **2.** *бот.* бер йыллыҡ; **одноле́тние расте́ния** бер йыллыҡ үҫемлектәр

**ОДНОЛЕ́ТНИК** *м*; *бот.* бер йыллыҡ үҫемлек

**ОДНОЛЕ́ТОК** *м* и **ОДНОЛЕ́ТКА** *ж*; *разг.* **1.** йәштәш, тиҫтер **2.** бер йыллыҡ (*үлән*); бер йәшлек (*мал*)

**ОДНОЛЮ́Б** *м* бер генә ҡатын-ҡыҙҙы яратҡан ир-ат; **однолю́бка** *ж* бер генә ирҙе яратҡан ҡатын-ҡыҙ

**ОДНОМА́СТНЫЙ,** -ая, -ое бер төҫлө, бер үк төҫтәге

**ОДНОМЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое бер урынлы, бер кешелек; **одноме́стная каю́та** бер урынлы каюта

**ОДНОМОТО́РНЫЙ,** -ая, -ое бер моторлы; **одномото́рный самолёт** бер моторлы самолёт

**ОДНОНО́ГИЙ,** -ая, -ое бер (һыңар) аяҡлы

**ОДНООБРА́ЗИЕ** *с* бер төрлөлөк (төҫлөлөк); **однообра́зие жи́зни** тормоштоң бер төрлөлөгө

**ОДНООБРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое бер төрлө (төҫлө), үҙгәрешһеҙ; **однообра́зная рабо́та** бер төрлө эш

**ОДНОПАЛА́ТНЫЙ,** -ая, -ое бер палаталы; **однопала́тный парла́мент** бер палаталы парламент

**ОДНОПА́ЛУБНЫЙ,** -ая, -ое бер палубалы; **однопа́лубное су́дно** бер палубалы судно

**ОДНОПА́ЛЫЙ,** -ая, -ое (*о человеке*) бер (һыңар) бармаҡлы; (*о животных*) һыңар тояҡлы

**ОДНОПОЛЧА́НИН** *м* полкташ

**ОДНОПО́ЛЫЙ,** -ая, -ое *бот.* бер енесле; **однопо́лое расте́ние** бер енесле үҫемлек

**ОДНОРО́ДНОСТЬ** *ж* бер төрлөлөк (төҫлөлөк, ишлелек); **одноро́дность явле́ний** күренештәрҙең бер төрлөлөгө

**ОДНОРО́ДНЫЙ,** -ая, -ое тиң, бер төрлө (төҫлө), бер төрҙәге, бер иш, оҡшаш; **одноро́дные сооруже́ния** бер төрлө ҡоролмалар; **одноро́дные расте́ния** бер төрҙәге үҫемлектәр ♦ **одноро́дные чле́ны предложе́ния** *грам.* һөйләмдең тиң киҫәктәре



25 зак. 2.0084.05

**ОДНОРУ́КИЙ,** -ая, -ое һыңар ҡуллы

**ОДНОСЕЛЬЧА́НИН** *м* и **ОДНОСЕЛЬЧА́НКА** *ж* ауылдаш

**ОДНОСЛО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое **1.** бер ижекле; **односло́жное сло́во** бер ижекле һүҙ **2.** *перен.* (*краткий*) ҡыҫҡа, өҙөк-өҙөк; **односло́жный отве́т** ҡыҫҡа яуап

**ОДНОСОСТА́ВНЫЙ: однососта́вное предложе́ние** *грам.* бер составлы һөйләм (*бер генә баш киҫәктән торған һөйләм*)

**ОДНОСПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бер кешелек, бер кеше йоҡларлыҡ; **односпа́льная крова́ть** бер кешелек карауат

**ОДНОСТВО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бер көбәкле; **одноство́льная винто́вка** бер көбәкле винтовка

**ОДНОСТВО́РЧАТЫЙ,** -ая, -ое бер ҡапҡаслы, бер яҡҡа асылмалы; **одноство́рчатая дверь** бер яҡҡа асылмалы ишек

**ОДНОСТОРО́ННИЙ,** -яя, -ее **1.** (*о ткани*) бер яҡлы, ике яғы ике төрлө; **односторо́нний драп** ике яғы ике төрлө драп **2.** бер яҡлы; **односторо́нний парали́ч** бер яҡлы паралич **3.** бер яҡҡа (табан), бер яҡлы; **односторо́ннее движе́ние тра́нспорта** транспорттың бер яҡҡа табан хәрәкәте **4.** *перен.* бер яҡлы, тар; **односторо́ннее реше́ние вопро́са** мәсьәләне бер яҡлы хәл итеү; **односторо́ннее разви́тие** бер яҡлы үҫеш

**ОДНОСТОРО́ННОСТЬ** *ж* тар ҡарашлылыҡ, бер яҡлылыҡ, сикләнгәнлек; **односторо́нность во взгля́дах** ҡараштарҙың бер яҡлылығы

**ОДНОСТУПЕ́НЧАТЫЙ,** -ая, -ое бер быуынлы; **одноступе́нчатая раке́та** бер быуынлы ракета

**ОДНОТИ́ПНЫЙ,** -ая, -ое бер (үк) типтағы; **однoти́пные маши́ны** бер үк типтағы машиналар

**ОДНОТО́МНИК** *м*; *разг.* бер томлыҡ (*китап*)

**ОДНОТО́МНЫЙ,** -ая, -ое бер томлы; **одното́мный слова́рь** бер томлы һүҙлек

**ОДНОФА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое бер фазалы

**ОДНОФАМИ́ЛЕЦ** *м* и **ОДНОФАМИ́ЛИЦА** *ж* фамилиялаш

**ОДНОЦВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое бер төҫтәге; **одноцве́тная ткань** бер төҫтәге туҡыма **2.** *перен.* бер төрлө (төҫлө); **одноцве́тная жизнь** бер төрлө тормош

**ОДНОЧЛЕ́Н** *м*; *мат.* бер быуын

**ОДНОЭТА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое бер ҡатлы; **одноэта́жный дом** бер ҡатлы йорт

**ОДОБРЕ́НИЕ** *с* хуплау, маҡтау, хуплау һүҙе; **во́згласы одобре́ния** хуплау тауыштары

**ОДОБРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое хуплаулы, ыңғай, яҡшы; **одобри́тельный о́тзыв** хуплаулы баһа

**ОДО́БРИТЬ** *сов. кого-что* хуплау, хуп күреү, раҫлау; **одо́брить мне́ние** *чьё-л. кемдеңдер* фекерен хуплау; **одо́брить прое́кт** проектты хуплау

**ОДОБРЯ́ТЬ** *несов. см.* **одо́брить**

**ОДОЛЕВА́ТЬ** *несов. см.* **одоле́ть**

**ОДОЛЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *прям.*, *перен.* (*осилить*) еңеү, еңеп сығыу, өҫтөн сығыу; **одоле́ть врага́** дошманды еңеү; **одоле́ть страх** ҡурҡыуҙы еңеү; **одоле́ть тру́дности** ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу **2.** *что*; *перен.*, *разг.* көскә үҙләштереү (эйә булыу, йырып сығыу һ.б.); **одоле́ть ле́стницу** баҫҡыс буйлап көскә менеү; **одоле́ть кни́гу** китапты көскә йырып сығыу; **одоле́ть матема́тику** математиканы көскә үҙләштереү **3.** *кого*; *перен.* (*охватить — о каком-л. состоянии*) тулыһынса буйһондороу, еңеү, баҫыу; **тоска́ одоле́ла** һағыш баҫты **4.** *кого*; *перен.*, *разг.* (*замучить*) йөҙәтеп бөтөү, яфалау, йөҙәтеү, аптыратыу, теңкәгә тейеү; **му́хи одоле́ли** себендәр йөҙәтеп бөттө

**ОДОЛЖА́ТЬ** *несов. см.* **одолжи́ть**

**ОДОЛЖЕ́НИЕ** *с* яҡшылыҡ итеү (эшләү, күрһәтеү), ярҙам, булышлыҡ; **проси́ть об одолже́нии** ярҙам күрһәтеүҙе һорау ♦ **сде́лай(те) одолже́ние**: 1) (*просьба*) зинһар өсөн, зинһар тип әйтәм; 2) (*вежливое согласие*) -һағыҙсы/-һәгеҙсе, -һағыҙ/-һәгеҙ ине, күрегеҙ; **за́втра мо́жно прийти? — Сделайте одолжение** иртәгә килергә мөмкинме? — Килә күрегеҙ

**ОДОЛЖИ́ТЬ** *сов. что, кому* **1.** бурысҡа (үтескә) биреү; **одолжи́ть де́ньги** *кому-л. берәйһенә* бурысҡа аҡса биреү **2.** *разг.* биреп тороу; **одолжи́те нож** бысаҡ биреп тороғоҙ әле

**ОДР** *м*; *уст.* түшәк ♦ **на сме́ртном одре́** үлем түшәгендә

**ОДРЯХЛЕ́НИЕ** *с см.* **одряхле́ть**

**ОДРЯХЛЕ́ТЬ** *сов.* ҡартайыу, ҡартайып ҡаҡшау

**ОДУВА́НЧИК** *м* бәпембә

**ОДУ́МАТЬСЯ** *сов.* аҡылға килеү, уйҙан (фекерҙән) ҡайтыу, кире уйлау, фекерҙе үҙгәртеү; **оду́маться в после́днюю мину́ту** һуңғы минутта кире уйлау; **что ты де́лаешь, оду́майся** нимә эшләйһең, аҡылыңа кил

**ОДУ́МЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **оду́маться**

**ОДУРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **одура́чить**

**ОДУРА́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* алдап көлкөгә ҡалдырыу, хурлыҡҡа төшөрөү, ахмаҡландырыу, ахмаҡҡа ҡалдырыу; **одура́чить люде́й** кешеләрҙе ахмаҡландырыу

**ОДУРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* йүләрләнгән, иҫәңгерәгән, иҫәрләнгән; **одуре́лый вид** иҫәңгерәгән ҡиәфәт

**ОДУРЕ́НИЕ** *с*; *разг.* баш ҡатыу, ҡаңғырыу, иҫәрләнеү; **до одуре́ния** иҫәрләнгәнсе

**ОДУРЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* иҫәрләнеү, йүләрләнеү; **одуре́ть от ра́дости** ҡыуаныстан иҫәрләнеү

**ОДУРМА́НИВАТЬ** *несов. см.* **одурма́нить**

**ОДУРМА́НИТЬ** *сов. кого-что* иҫертеү, аңды томаландырыу; **одурма́нить во́дкой** араҡы эсереп иҫертеү; **одурма́нить созна́ние** аңды томаландырыу

**О́ДУРЬ** *ж*; *разг.* тилелек, баш (аң) томаланыу (ҡатыу); **спо́рить до о́дури** баш ҡатҡансы бәхәсләшеү; **о́дурь нашла́** баш томаланып китте

**ОДУРЯ́ТЬ** *несов. кого-что*; *разг.* иҫертеү, башты (аңды, зиһенде) томалау; **пья́нство одуря́ет** эскелек зиһенде томалай

**ОДУТЛОВА́ТОСТЬ** *ж* ҡабарынҡылыҡ, шешенгән һымаҡ булыу

**ОДУТЛОВА́ТЫЙ,** -ая, -ое шешмәк, тумпаҡ, шешенгән һымаҡ; **одутлова́тое лицо́** бит шешенгән һымаҡ

**ОДУХОТВОРЁННОСТЬ** *ж* күтәренке рухлылыҡ, дәртлелек

**ОДУХОТВОРЁННЫЙ,** -ая, -ое дәртле, күтәренке рухлы, күңел күтәренкелеге, күтәренке күңел; **одухотворённая речь** күтәренке рухлы телмәр

**ОДУХОТВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*природу, животных*) йәнләндереү, йәнле тип һанау; **одухотвори́ть ка́мни** таштарҙы йәнле тип һанау **2.** (*воодушевить*) рухландырыу, рухын күтәреү, дәртләндереү; **одухотвори́ть челове́ка высо́кими идеа́лами** кешене бөйөк идеалдар менән рухландырыу

**ОДУХОТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **одухотвори́ть**

**ОДУШЕВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* йәнле тип таныу, йәнләндереү **2.** *кого-что*; *уст.* (*воодушевить*) рухландырыу, рухын күтәреү

**ОДУШЕВИ́ТЬСЯ** *сов. чем*; *уст.* рухланыу, рух күтәрелеү, дәртләнеү

**ОДУШЕВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **одушеви́ть** 1; **2.** *уст.* (*подъём духа*) күтәренке рух; **говори́ть с одушевле́нием** күтәренке рух менән һөйләү

**ОДУШЕВЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **одушеви́ть 2.** *прил.* тере, күтәренке рухлы, дәртле, йәнле; **каза́ться одушевлённым** күтәренке рухлы булып күренеү **3.** *прил.*; *уст.* рухландырылған, күтәренке рухлы; **одушевлённый труд** рухландырылған хеҙмәт; **одушевлённое лицо́** рухлы йөҙ **4.** *прил.*; *грам.* йәнле

**ОДУШЕВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **одушеви́ться 2.** *страд. от* **одушевля́ть**

**ОДЫ́ШКА** *ж* тын ҡыҫылыу (ҡурылыу), күкрәк ҡыҫыу; **страда́ть оды́шкой** тын ҡыҫылып яфаланыу

**ОЖЕРЕБИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡолонлау

**ОЖЕРЕ́ЛЬЕ** *с* муйынсаҡ, мунсаҡ; **жемчу́жное ожере́лье** ынйы мунсаҡ

**ОЖЕСТОЧА́ТЬ** *несов. см.* **ожесточи́ть**

**ОЖЕСТОЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ожесточи́ться 2.** *страд. от* **ожесточа́ть**

**ОЖЕСТОЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ожесточи́ть** – **ожесточа́ть 2.** (*озлобление*) аяуһыҙланыу, шәфҡәтһеҙләнеү, рәхимһеҙлек; **ожесточе́ние во всех** бөтә нәмәлә рәхимһеҙлек күрһәтеү **3.** (*крайнее напряжение, упорство*) көс(әнеү), ныҡышмалыҡ; **заигра́ть с ожесточе́нием** ныҡышмалыҡ менән уйнай башлау; **дока́зывать с ожесточе́нием** ныҡышмалыҡ менән иҫбатлау

**ОЖЕСТОЧЁННОСТЬ** *ж* аяуһыҙлыҡ, шәфҡәтһеҙлек, рәхимһеҙлек; **чу́вство ожесточённости** аяуһыҙлыҡ тойғоһо

**ОЖЕСТОЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **ожесточи́ть 2.** *прил.* ҡаты, киҫкен, шәфҡәтһеҙ, аяуһыҙ; **ожесточённое се́рдце** ҡаты күңелле (бәғерле) **3.** *прил.* (*исполненный упорства*) ҡаты, көсәргәнешле, ныҡышмалы; **ожесточённый бой** ҡаты һуғыш

**ОЖЕСТОЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* аяуһыҙландырыу, шәфҡәтһеҙләндереү, уҫалландырыу, яуызландырыу, рәхимһеҙләндереү, асыуландырыу, асыуын ҡабартыу; **э́ти слова́ ожесточи́ли де́вушку** был һүҙҙәр ҡыҙҙың асыуын ҡабартты

**ОЖЕСТОЧИ́ТЬСЯ** *сов.* аяуһыҙланыу, шәфҡәтһеҙләнеү, ҡаты бәғерлегә әйләнеү, яуызланыу, уҫаллашыу; **ожесточи́ться душо́й** күңел ҡатыу

**ОЖЕ́ЧЬСЯ** *сов. см.* **обже́чься**

**ОЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **ожи́ть**

**ОЖИВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* терелтеү, йән керетеү (өрөү), яңы көс өҫтәү; **оживи́ть органи́зм** организмды терелтеү; **весна́ оживи́ла больно́го** яҙ ауырыуға көс өҫтәне **2.** *что*; *перен.* хәтергә төшөрөү (ҡайтарыу), күҙ алдына килтереү, йәнләндереү, уятыу; **оживи́ть в па́мяти о́браз** *чей-л. кемдеңдер* образын күҙ алдына килтереү; **оживи́ть воспомина́ния** хәтирәләрҙе иҫкә төшөрөү **3.** *что* йәнләндереү, йәнләндереп ебәреү; **оживи́ть рабо́ту кружка́** түңәрәк эшен йәнләндереү **4.** *кого-что* йәнләндереү, яҡтыртыу, яҡтыртып ебәреү; **ра́дость оживи́ла его́ лицо́** шатлыҡ уның йөҙөн яҡтыртып ебәрҙе

**ОЖИВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* йәнләнеү, йәнләнеп (яҡтырып) китеү, уяныу; **больно́й оживи́лся** ауырыу йәнләнеп китте; **приро́да оживи́лась** тәбиғәт уянды; **глаза́ его́ оживи́лись** уның күҙҙәре йәнләнеп китте; **у́лицы оживи́лись** урамдар йәнләнде; **рабо́та оживи́лась** эш йәнләнде

**ОЖИВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **оживи́ть**, **оживи́ться** **2.** йәнлелек, ҡыҙыу хәрәкәт; **пра́здничное оживле́ние** байрамда була торған йәнлелек

**ОЖИВЛЁННОСТЬ** *ж* йәнлелек, күңеллелек

**ОЖИВЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **оживи́ть 2.** *прил.* күтәренке, күңелле; **оживлённый вид** күңелле ҡиәфәт **3.** *прил.* йәнле, ҡыҙыу; **оживлённый спор** ҡыҙыу бәхәс **4.** *прил.* хәрәкәт ҡыҙыу булған, ҡыҙыу хәрәкәтле; **оживлённая у́лица** хәрәкәт ҡыҙыу булған урам

**ОЖИВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **оживи́ть**

**ОЖИВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оживи́ться 2.** *страд. от* **оживля́ть**

**ОЖИДА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ожида́ть 2.** *обычно мн.* **ожида́ния** (*надежда на что-л.*) өмөт, көтөү,

көткән нәмә; **вопреки́ ожида́ниям** көтмәҫтән, көтмәгәндә

**ОЖИДА́ТЬ** *несов. кого-что, чего* **1.** көтөү, көтөп тороу; **ожида́ть изве́стий** хәбәр көтөп тороу **2.** (*надеяться на что-л., предполагать*) көтөү, өмөт итеү; **ожида́ть бо́льшего** күпте өмөт итеү

**ОЖИДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** көтөлөү; **ожида́ются за́морозки** ҡырау көтөлә **2.** *страд. от* **ожида́ть**

**ОЖИРЕ́НИЕ** *с см.* **ожире́ть**; **страда́ть ожире́нием** һимереү менән яфаланыу

**ОЖИРЕ́ТЬ** *сов.* һимереү, һимереп китеү, май бөрөү (ҡаплау)

**ОЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** терелеү, йән инеү; **се́рдце о́жило** йөрәккә йән инде **2.** *перен.* (*выйти из состояния уныния, повеселеть*) йәнләнеү, йәнләнеп китеү, күңелләнеү; **мой собесе́дник сра́зу о́жил** әңгәмәсем йәнләнеп китте **3.** *перен.* иҫкә төшөү, күҙ алдына килеп баҫыу; **воспомина́ния о́жили** иҫтәлектәр күҙ алдына килеп баҫты **4.** *перен.* йәнләнеү, уяныу; **вулка́н о́жил** вулкан уянды

**ОЖО́Г** *м* **1.** бешеү, бешереү, яндырыу, яныу; **ожо́г руки́** ҡул яныу **2.** (*обожжённое место*) бешкән (янған) урын

**ОЗАБО́ТИТЬ** *сов. кого-что* борсоу, борсолдороу, мәшәҡәтләү; **озабо́тить роди́телей** атаәсәне борсолдороу

**ОЗАБО́ТИТЬСЯ** *сов. чем* хәстәрләү, мәшәҡәтләнеү, ҡайғыртыу; **озабо́титься о дрова́х** утын тураһында ҡайғыртыу

**ОЗАБО́ЧЕННОСТЬ** *ж* борсолоу, ҡайғыртыусанлыҡ; **проявля́ть озабо́ченность** ҡайғыртыусанлыҡ күрһәтеү

**ОЗАБО́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **озабо́тить 2.** *прил.* борсоулы, борсолған, тынғыһыҙ; **озабо́ченное лицо́** борсоулы йөҙ

**ОЗАГЛА́ВИТЬ** *сов. что* исем биреү (ҡуйыу); **озагла́вить кни́гу** китапҡа исем биреү

**ОЗАДА́ЧЕННОСТЬ** *ж* аптыраш, аптырағанлыҡ, аптырау; **выража́ть глубо́кую озада́ченность** тәрән аптыраш белдереү

**ОЗАДА́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **озада́чить 2.** *прил.* аптыраған, аптырашта ҡалған, аптыраулы, шикле; **озада́ченное лицо́** аптыраулы йөҙ

**ОЗАДА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **озада́чить**

**ОЗАДА́ЧИТЬ** *сов. кого-что, чем* аптырашта ҡалдырыу, аптыратыу

**ОЗАРЕ́НИЕ** *с*; *книжн. см.* **озари́ть — озаря́ть**, **озари́ться — озаря́ться**

**ОЗАРИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*осветить*) яҡтыртыу; **озари́ть ко́мнату** бүлмәне яҡтыртыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*оживить*) йәнләндереү, нурландырыу, яҡтыртып ебәреү, балҡытыу; **озари́ть сча́стьем** бәхет менән балҡытыу **3.** *кого-что*; *перен.* (*неожиданно прийти на ум*) башҡа килеү, уй төшөү (килеү)

**ОЗАРИ́ТЬСЯ** *сов.*; *высок.* **1.** яҡтырыу, яҡтырып китеү **2.** *перен.* йәнләнеү, нурланыу, балҡыу, яҡтырыу, балҡып (яҡтырып) китеү; **его́ лицо́ озари́лось наде́ждой** уның йөҙө өмөт менән балҡыны

**ОЗАРЯ́ТЬ** *несов. см.* **озари́ть**

**ОЗАРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **озари́ться 2.** *страд. от* **озаря́ть**

**ОЗВЕРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое йыртҡысланған, ҡоторонған; **озвере́лая толпа́** ҡоторонған төркөм

**ОЗВЕРЕ́ТЬ** *сов.* йыртҡысланыу, ҡотороу

**ОЗВУ́ЧЕНИЕ** и **ОЗВУ́ЧИВАНИЕ** *с см.* **озву́чить**

**ОЗВУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **озву́чить**

**ОЗВУ́ЧИТЬ** *сов. что* тауышлы итеү, тауышландырыу; **озву́чить фильм** фильмды тауышлы итеү

**ОЗДОРОВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һауыҡтырғыс, һауыҡтырыу (сәләмәтләндереү) ...ы; **оздорови́тельные мероприя́тия** һауыҡтырыу саралары; **оздорови́тельный ла́герь** һауыҡтырыу лагеры

**ОЗДОРОВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һауыҡтырыу, сәләмәтләндереү; **оздорови́ть дете́й** балаларҙы сәләмәтләндереү **2.** яҡтыртыу, таҙартыу; **оздорови́ть усло́вия труда́** эш шарттарын яҡшыртыу **3.** *что*; *перен.* көйләп (юлға һалып) ебәреү, рәткә һалыу, яҡшыртыу; **оздорови́ть обстано́вку в коллекти́ве** коллективта хәлде юлға һалып ебәреү

**ОЗДОРОВЛЕ́НИЕ** *с см.* **оздорови́ть**

**ОЗДОРОВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **оздорови́ть**

**ОЗЕЛЕНЕ́НИЕ** *с см.* **озелени́ть**

**ОЗЕЛЕНИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йәшелләндереү ...ы, ағас ултыртыу ...ы; **озелени́тельные рабо́ты** йәшелләндереү эштәре

**ОЗЕЛЕНИ́ТЬ** *сов. что* йәшелләндереү, ағас ултыртыу; **озелени́ть двор** ишек алдын йәшелләндереү

**ОЗЕЛЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **озелени́ть**

**О́ЗЕМЬ** *нареч.*; *разг.* ергә; **гро́хнуться о́земь** ергә гөп итеп йығылыу

**ОЗЁРНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күл ...ы; **озёрная вода́** күл һыуы; **озёрная ры́ба** күл балығы; **озёрный флот** күл флоты **2.** күлгә бай, күлле; **озёрная ме́стность** күлгә бай урын

**О́ЗЕРО** *с* күл; **глубо́кое о́зеро** тәрән күл

**ОЗИ́МЫЙ,** -ая, -ое **1.** ужым ...ы; **ози́мая пшени́ца** ужым бойҙайы **2.** *в знач. сущ.* **ози́мые** *мн.* ужым ашлыҡтары; **убо́рка ози́мых** ужым ашлыҡтарын йыйыу

**О́ЗИМЬ** *ж* **1.** (*всходы*) ужым, көҙгө сәсеүлек **2.** (*поле*) ужым баҫыуы

**ОЗИРА́ТЬ** *несов. кого-что* ҡараш ташлау, күҙ йөрөтөү (байҡау), тирә-яҡты ҡарау; **озира́ть знако́мые места́** таныш урындарға ҡараш ташлау

**ОЗИРА́ТЬСЯ** *несов.* тирә-яҡҡа ҡараш ташлау, ҡараныу, ҡаранғылау

**ОЗЛО́БИТЬ** *сов. кого-что* асыуландырыу, асыуын ҡабартыу, үсектереү

**ОЗЛО́БИТЬСЯ** *сов.* асыуланыу, асыу ҡабарыу (килеү), үсегеү

**ОЗЛОБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **озло́бить** — **озло́биться 2.** (*злость*) асыу, асыу килеү, асыу тотоу

**ОЗЛО́БЛЕННОСТЬ** *ж* асыулылыҡ, асыулы булыу

**ОЗЛО́БЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **озло́бить 2.** *прил.* асыулы, асыуы килгән; **озло́бленное лицо́** асыулы йөҙ

**ОЗЛОБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **озло́бить**

**ОЗЛОБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **озло́биться 2.** *страд. от* **озлобля́ть**

**ОЗНАКО́МИТЬ** *сов. кого-что, с чем* таныштырыу, таныштырып сығыу; **ознако́мить с положе́нием дел** эштең торошо менән таныштырыу

**ОЗНАКО́МИТЬСЯ** *сов. с кем-чем* танышыу, танышып сығыу; **ознако́миться с резолю́цией** резолюция менән танышып сығыу

**ОЗНАКОМЛЕ́НИЕ** *с см.* **ознако́мить, ознако́миться**; **ознакомле́ние с литерату́рой** әҙәбиәт менән танышыу

**ОЗНАКОМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **ознако́мить**

**ОЗНАКОМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ознако́миться 2.** *страд. от* **ознакомля́ть**

**ОЗНАМЕНОВА́НИЕ** *с см.* **ознаменова́ть** ♦ **в ознаменова́ние** *чего нимәлер* хөрмәтенә

**ОЗНАМЕНОВА́ТЬ** *сов. что* билдәләү, билдәләп үтеү; **ознаменова́ть пра́здник** байрамды билдәләп үтеү

**ОЗНАМЕНОВА́ТЬСЯ** *сов.* билдәләнеү, билдәләнеп үтеү

**ОЗНАЧА́ТЬ** *несов. что* аңлатыу, белдереү, нимәгәлер тиң булыу, күрһәтеү, күрһәтеп тороу; **что э́то означа́ет** был нимә аңлата

**ОЗНА́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **означа́ть 2.** *прил.*; *уст.* (алда) күрһәтелгән (билдәләнгән); **в озна́ченный день** алда күрһәтелгән көндө

**ОЗНО́Б** *м* өшөп ҡалтыраныу, дерелдәү

**ОЗОКЕРИ́Т** *м*; *мин.* озокерит, тау балауыҙы

**ОЗОЛОТИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** алтынға буяу (маныу), алтын төҫөнә индереү **2.** *разг.* мул аҡса биреү, байытыу, алтынға (байлыҡҡа) күмеү; **озолоти́ть за услу́ги** хеҙмәттәре өсөн мул аҡса биреү

**ОЗО́Н** *м* озон (*газ*)

**ОЗОНА́ТОР** *м* озонатор (*һауаны озонлау ҡорамалы*)

**ОЗОНИ́РОВАНИЕ** *с см.* **озони́ровать**

**ОЗОНИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* **1.** *хим.* озонға әйләндереү (әүерелдереү) **2.** озонлау, озон менән таҙартыу; **озони́ровать во́ду** һыуҙы озонлау

**ОЗОРНИ́К** *м* и **ОЗОРНИ́ЦА** *ж* шаян, шуҡ

**ОЗОРНИЧА́ТЬ** *несов.* шаярыу, шуҡлыҡ күрһәтеү

**ОЗОРНО́Й,** -ая, -ое шаян, шуҡ; **озорно́й ребёнок** шуҡ бала; **озорна́я улы́бка** шаян йылмайыу

**ОЗОРСТВО́** *с* шаянлыҡ, шуҡлыҡ

**ОЗЯ́БНУТЬ** *сов.*; *разг.* өшөү, туңыу; **озя́бли но́ги** аяҡтар өшөнө

**ОЙ** *межд.* (*выражает боль, испуг, удивление, восхищение и т.п.*) ай, абау, һай-һай; **ой, как бо́льно!** ай, ҡайһылай ауырта!; **ой, как хорошо́ живу́т!** һай-һай, нисек яҡшы йәшәйҙәр!

**ОКАЗА́НИЕ** *с см.* **оказа́ть**

**ОКАЗА́ТЬ** *сов. что* күрһәтеү, белдереү, яһау; **оказа́ть по́мощь** ярҙам күрһәтеү; **оказа́ть дове́рие** ышаныс белдереү; **оказа́ть сопротивле́ние** ҡаршылыҡ күрһәтеү

**ОКАЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** булып сығыу, асыҡланыу; **оказа́лось, что они́ сосе́ди** улар күрше булып сыҡты **2.** барып (килеп) сығыу, ҡалыу, булыу, булып сығыу; **он оказа́лся до́ма** ул өйҙә булып сыҡты; **оказа́ться в смешно́м положе́нии** көлкөгә ҡалыу ♦ **оказа́ться на высоте́** тейешле юғарылыҡта (кимәлдә) ҡалыу; **оказа́ться у разби́того коры́та** ярыҡ ялғаш янында ҡалыу, бер нәмәһеҙ ҡалыу

**ОКА́ЗИЯ** *ж* **1.** *разг.* мөмкинлек, мөмкинселек, юл ыңғайында ебәреү (барыу, китеү); **уе́хать с пе́рвой же ока́зией** беренсе мөмкинселек менән китеү **2.** *разг.* хикмәт, ғәжәп хәл; **что за ока́зия?** был ниндәй хикмәт?

**ОКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **оказа́ть**

**ОКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оказа́ться 2.** *в знач. вводн. сл.* **ока́зывается** (*как выясняется*) икән, баҡһаң; **он, ока́зывается, из Москвы́** ул Мәскәүҙән икән **3.** *страд. от* **ока́зывать**

**ОКАЙМИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сделать кайму*) ҡаймалау, ҡаймалап (ҡайма) тотоп сығыу **2.** *перен.* уратып (әйләндереп) алыу

**ОКАЙМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **окайми́ть**

**ОКА́ЛИНА** *ж*; *тех.* көйөк; **желе́зная ока́лина** (яндырылған) тимер көйөгө

**ОКАМЕНЕ́ЛОСТЬ** *ж* **1.** таш булып ҡатыу **2.** *обычно мн.* **окамене́лости** (*окаменевшие остатки животных или растений*) ташҡа әүерелгән (хайуан, үсемлек) ҡалдыҡтар(ы)

**ОКАМЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** ташҡа әүерелгән (әйләнгән), таш кеүек ҡатҡан; **окамене́лое де́рево** ташҡа әүерелгән ағас **2.** *перен.* (*неподвижный, безжизненный*) ҡатып ҡалған, йәнһеҙ, хәрәкәтһеҙ; **окамене́лое лицо́** ҡатып ҡалған йөҙ **3.** *перен.* ҡаты (таш) бәғерле, рәхимһеҙ; **окамене́лое се́рдце** ҡаты бәғерле, таш йөрәк

**ОКАМЕНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ташҡа әүерелеү (әйләнеү) **2.** *перен.* ҡатып ҡалыу; **окамене́ть от удивле́ния** аптырауҙан ҡатып ҡалыу **3.** ҡаты (таш) бәғерләнеү, таш бәғергә әйләнеү

**ОКАНТОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** ҡаймалау **2.** *спец.* ҡырлау; **окантова́ть бревно́** бүрәнә ҡырлау

**ОКАНТО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **окантова́ть — оканто́вывать 2.** ҡайма; **у́зкая оканто́вка** нәҙек ҡайма

**ОКАНТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **окантова́ть**

**ОКА́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **око́нчить**

**ОКА́НЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **око́нчиться 2.** *страд. от* **ока́нчивать**

**ОКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **окопа́ть**

**ОКА́ПЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **окопа́ться 2.** *страд. от* **ока́пывать**

**ОКАТИ́ТЬ** *сов. кого-что* (*облить*) ҡойондороу; **окати́ть ребёнка водо́й** баланы һыу ҡойондороу

**ОКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡойоноу; **окати́ться холо́дной водо́й** һыуыҡ һыу менән ҡойоноу

**О́КАТЬ** *несов.* "о"лаштырып һөйләү (*төньяҡ урыҫ диалекттарында*)

**ОКАЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое *уст.* ҡәһәр һуҡҡан, ләғнәт төшкән, мәлғүн

**ОКЕА́Н** *м* **1.** океан; **Ти́хий океа́н** Тымыҡ океан **2.** *перен.* икһеҙ-сикһеҙ, сикһеҙ күп, бик күп; **океа́н слёз** сикһеҙ күп күҙ йәше ♦ **возду́шный океа́н** һауа океаны, атмосфера

**ОКЕАНА́ВТ** *м* океансы, океанавт, океан тикшеренеүсеһе

**ОКЕАНА́РИЙ** и **ОКЕАНА́РИУМ** *м* океанариум (*диңгеҙ хайуандарын һәм балыҡтарын үрсетеү, уларҙың йәшәйешен күҙәтеү өсөн йыһазланған бассейн*)

**ОКЕАНИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *спец.* океан ...ы, океанда ...ы; **океани́ческие тече́ния** океан ағымдары; **океани́ческое рыболо́вство** океанда балыҡ тотоу

**ОКЕАНОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое океанографик ...ы; **океанографи́ческое иссле́дование** океанографик тикшеренеү

**ОКЕАНОГРА́ФИЯ** *ж* океанография (*диңгеҙ һәм океандарҙы өйрәнеү фәне*)

**ОКЕАНОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое океанология ...ы, океанологик; **океанологи́ческая экспеди́ция** океанология экспедицияһы

**ОКЕАНОЛО́ГИЯ** *ж* океанология (*диңгеҙ һәм океандарҙы өйрәнә торған фән*)

**ОКЕА́НСКИЙ,** -ая, -ое океан ...ы; **океа́нский ла́йнер** океан лайнеры

**ОКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **оки́нуть**

**ОКИ́НУТЬ: оки́нуть взбром (взгля́дом, глаза́ми)** *кого-что* күҙ ташлау, ҡарап (күҙ йөрөтөп) алыу

**О́КИСЕЛ** *м*; *хим.* әсемтә, окисел

**ОКИСЛЕ́НИЕ** *с*; *хим.* әселәнеү, окисланыу; **окисле́ние мета́лла** металдың окисланыуы

**ОКИСЛИ́ТЕЛЬ** *м*; *хим.* әсетмә (әсетке), окислаштырыусы

**ОКИСЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *хим.* әселәндереү ...ы, окисланған; **окисли́тельный проце́сс** әселәндереү процесы

**ОКИСЛИ́ТЬ** и **ОКИ́СЛИТЬ** *сов. что*; *хим.* әселәндереү, окисландырыу

**ОКИСЛИ́ТЬСЯ** и **ОКИ́СЛИТЬСЯ** *сов.*; *хим.* әселәнеү, окисланыу

**ОКИСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **окисли́ть**

**ОКИСЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **окисли́ться 2.** *страд. от* **окисля́ть**

**О́КИСЬ** *ж*; *хим.* әсемә, окись

**ОККУ́ЛЬТНЫЙ,** -ая, -ое *рел.* аңлатып булмай торған, серле

**ОККУПА́НТ** *м* илбаҫар, оккупант

**ОККУПАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое баҫҡынсыл, баҫып алыусы; **оккупацио́нные войска́** баҫҡынсыл ғәскәрҙәр

**ОККУПА́ЦИЯ** *ж* оккупация, баҫҡынсылыҡ, баҫып алыу; **оккупа́ция страны́** илде баҫып алыу

**ОККУПИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* баҫып алыу, оккупация (баҫҡынлыҡ) яһау, оккупациялау

**ОКЛА́Д** *м* **1.** оклад, хеҙмәт хаҡы; **ме́сячный окла́д** айлыҡ хеҙмәт хаҡы **2.** *фин.* (*налог*) аҡсалата һалым; **поду́шный окла́д** йән башына аҡсалата һалым

**ОКЛА́ДИСТЫЙ: окла́дистая борода́** күркәм һаҡал

**ОКЛЕВЕТА́ТЬ** *сов. кого-что* яла ягыу, ҡара ягыу

**ОКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **окле́ить**

**ОКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* йәбештереү, йәбештереп сығыу; **окле́ить сте́ны обо́ями** стеналарға обой йәбештереү

**ОКЛЕ́ЙКА** *ж см.* **окле́ить — окле́ивать**

**О́КЛИК** *м* өндәшеү, тауыш биреү, өндәшеү тауышы

**ОКЛИКА́ТЬ** *несов. см.* **окли́кнуть**

**ОКЛИ́КНУТЬ** *сов. кого* өндәшеү, өндәшеп (ҡысҡырып) туҡтатыу, саҡырыу

**ОКНО́** *с* **1.** тәҙрә; **ко́мната в три окна́** өс тәҙрәле бүлмә; **откры́ть окно́** тәҙрәне асыу **2.** *разг.* (*подоконник*) тәҙрә төбө; **сесть на окно́** тәҙрә төбөнә ултырыу **3.** (*просвет, отверстие в чём-л.*) тишек, асыҡ урын, асыҡлыҡ; **окно́ ме́жду туч** болоттар араһындағы асыҡлыҡ **4.** *разг.* (*промежуток времени*) буш ваҡыт (сәғәт); **окно́ ме́жду уро́ками** дәрестәр араһындағы буш ваҡыт

**О́КО** *с*; *уст., трад.-поэт.* күҙ ♦ **хоть ви́дит о́ко, да зуб неймёт** күҙ күрә лә — теш үтмәй; **о́ко за о́ко, зуб за зуб** ҡанға — ҡан, үлемгә — үлем

**ОКОВА́ТЬ** *сов. что, чем* **1.** көпләү, ҡаплау (*тимер йәки ҡалай менән*); **окова́ть сунду́к желе́зом** һандыҡты тимер менән көпләү **2.** *уст.* сырмау, сырмап бәйләү **3.** *перен.* биләү, солғау, биләп (солғап) алыу; **окова́л страх** ҡурҡыу солғап алды **4.** *перен.* ҡаплап алыу (*туңдырып*); **лёд окова́л реку́** йылғаны боҙ ҡаплап алды

**ОКО́ВКА** *ж см.* **окова́ть — око́вывать**

**ОКО́ВЫ** *только мн.* **1.** *уст.* (*ножные*) бығау; (*ручные*) ҡулатҡа, ҡул бығауы **2.** *перен.* бығау; **разби́ть око́вы ра́бства** ҡоллоҡ бығауҙарын емереү

**ОКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **окова́ть**

**ОКОЛДОВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям.*, *перен.* сихырлау, күҙ быуыу; (*очаровать*) һоҡландырыу, (үҙенә) ҡаратыу

**ОКОЛДО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **околдова́ть**

**ОКОЛЕВА́ТЬ** *несов. см.* **околе́ть**

**ОКОЛЁСИЦА: нести́ околёсицу** буш һүҙ һөйләү

**ОКОЛЕ́ТЬ** *сов.* үлеү (*хайуанға ҡарата*)

**ОКО́ЛИЦА** *ж* ауыл кәртәһе; **за око́лицей села́** ауыл кәртәһе аръяғында

**О́КОЛО** *предлог с род. п.* **1.** (*поблизости, рядом с кем-чем-л.*) эргәһендә, янында, тирәһендә, йәнәш; **стоя́ть о́коло до́ма** өй эргәһендә тороу **2.** (*при обозначении примерной, приблизительной величины, протяжённости, длительности и т.п. чего-л.*) тирәһе, самаһы, тирәһендә; **мы шли о́коло ча́са** беҙ бер сәғәт самаһы барҙыҡ; **о́коло семи́ часо́в ве́чера** киске сәғәт ете тирәһендә ♦ **вокру́г да о́коло**; **круго́м да о́коло** уратып-суратып, эштең айышына төшөнмәйенсә, эштең асылын аңламай, әйләнә-тирәләп кенә

**ОКОЛОЗВЁЗДНЫЙ,** -ая, -ое йондоҙ тирәһендәге (янындағы), йондоҙ әйләнә-тирәһендәге; **околозвёздная орби́та** йондоҙ тирәһендәге орбита

**ОКОЛОЗЕ́МНЫЙ,** -ая, -ое Ер янындағы (тирәһендәге); **вы́вести раке́ту на околозе́мную орби́ту** ракетаны Ер тирәһендәге орбитаға сығарыу

**ОКОЛОЛУ́ННЫЙ,** -ая, -ое Ай янындағы (тирәһендәге); **окололу́нная орби́та** Ай тирәһендәге орбита

**ОКОЛОПЛО́ДНИК** *м*; *бот.* емешлек эргәлеге

**ОКОЛОПЛО́ДНЫЙ,** -ая, -ое *физиол.*, *анат.* яралғы тирәһендәге, яралғыны һаҡлай торған; **околопло́дная жи́дкость** яралғыны һаҡлай торған шыйыҡлыҡ

**ОКОЛОСЕРДЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* йөрәк тирәһендәге, йөрәкте ураҡҡан, **околосерде́чная су́мка** йөрәк тирәһендәге тоҡсай

**ОКОЛОУ́ШНЫЙ,** -ая, -ое *анат.* ҡолаҡ янындағы; **околоу́шная железа́** ҡолаҡ янындағы биҙ

**ОКОЛОЦВЕ́ТНИК** *м*; *бот.* сәскә эргәлеге

**ОКОЛПА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **околпа́чить**

**ОКОЛПА́ЧИТЬ** *сов. кого-что*; *прост.* алдау, төп башына ултыртыу

**ОКО́ЛЫШ** *м* (*на фуражке*) тирәс; (*на шапке*) ҡырпыу; **ша́пка с око́лышем** ҡырпыулы бүрек, ҡырма бүрек

**ОКО́ЛЫШЕК** *м*; *уменьш.* от **око́лыш**

**ОКО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** урау; **око́льный путь** урау юл **2.** *перен.* хәйләле, аҫтыртын, йәшерен; **узна́ть око́льным путём** *что-л. нимәнелер* аҫтыртын белешеү

**ОКОЛЬЦЕВА́ТЬ** *сов. кого-что*; *спец.* балдаҡлау; **окольцева́ть ле́бедя** аҡҡошто балдаҡлау; **окольцева́ть де́рево** ағасты балдаҡлау

**ОКОЛЬЦО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **окольцева́ть**

**ОКОНЕ́ЧНОСТЬ** *ж* сик, ос, ҡыр, сит; **се́верная оконе́чность о́строва** утрауҙың төньяҡ сиге

**ОКО́ННЫЙ,** -ая, -ое тәҙрә ...ы; **око́нное стекло́** тәҙрә быялаһы

**ОКОНФУ́ЗИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* оялтыу, оятҡа ҡалдырыу, оятлы итеү

**ОКОНФУ́ЗИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* оялыу, оятлы булыу, оятҡа ҡалыу

**ОКОНЧА́НИЕ** *с* **1.** бөтөү, тамам булыу, тамамланыу; **оконча́ние похо́да** походтың тамамланыуы **2.** аҙаҡ, ахыр, һуң; **оконча́ние рома́на** романдың аҙағы **3.** *грам.* ялғау; **паде́жные оконча́ния** килеш ялғауҙары

**ОКОНЧА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҙаҡҡы, һуңғы, ахырғы; **оконча́тельный вы́вод** һуңғы һығымта **2.** (*не подлежащий изменению*) ҡәтғи, өҙөп; **оконча́тельный отве́т** ҡәтғи яуап **3.** (*полный*) тулы, тулыһынса, тамам; **оконча́тельная побе́да** тулы еңеү

**ОКО́НЧИТЬ** *сов. что* бөтөрөү, тамамлау; **око́нчить рабо́ту** эште бөтөрөү; **око́нчить шко́лу** мәктәпте тамамлау

**ОКО́НЧИТЬСЯ** *сов.* бөтөү, тамамланыу; **переры́в око́нчился** тәнәфес бөттө

**ОКО́П** *м* окоп; **рыть око́пы** окоптар ҡаҙыу

**ОКОПА́ТЬ** *сов. что* **1.** тирәләй ҡаҙыу, уратып ҡаҙып сығыу; **окопа́ть де́рево** ағасты уратып ҡаҙып сығыу **2.** (*обвести рвом, канавой*) уратып ҡаҙып сығыу (канау, вал менән); **окопа́ть пала́тку** палатканың тирәһен уратып ҡаҙып сығыу

**ОКОПА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** окоп ҡаҙып урынлашыу; **полк окопа́лся по бе́регу** полк яр буйына окоп ҡаҙып урынлашты **2.** *перен.*, *разг.* тыныс урынға урынлашыу

**ОКО́ПНЫЙ,** -ая, -ое окоп ...ы; **око́пная ли́ния** окоп линияһы (һыҙығы) ♦ **око́пная война́** окоп һуғышы

**О́КОРОК** *м* бот ите; **свино́й о́корок** суҫҡаның бот ите

**ОКОСТЕНЕВА́ТЬ** *несов. см.* **окостене́ть**

**ОКОСТЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*превратившийся в кость*) һөйәккә әйләнгән **2.** ҡатҡан, туңып ҡатҡан; **окостене́лые ру́ки** ҡатҡан ҡулдар **3.** *перен.* ҡатып ҡалған; **окостене́лый ум** ҡатып ҡалған аҡыл

**ОКОСТЕНЕ́НИЕ** *с см.* **окостене́ть**; **окостене́ние хряща́** кимерсәктең һөйәккә әйләнеүе

**ОКОСТЕНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*превратиться в кость*) һөйәкләнеү, һөйәккә әйләнеү **2.** *прям.*, *перен.* ҡатыу, ҡатып ҡалыу; **па́льцы окостене́ли** бармаҡтар ҡатты

**ОКО́Т** *м см.* **окоти́ться**

**ОКОТИ́ТЬСЯ** *сов.* балалау (*бесәй, ҡуян, тейен, арыҫлан һ.б. ҡарата*); бәрәсләү (*һарыҡ, кәзә һ.б. ҡарата*)

**ОКОЧЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое өшөп (туңып) ҡатҡан, өшөгән; **окочене́лые па́льцы** туңып ҡатҡан бармаҡтар

**ОКОЧЕНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** туңыу, ҡатыу, туңып ҡатыу, өшөү; **совсе́м окочене́ть на ветру́** елгә бөтөнләй туңып ҡатыу **2.** *перен.* ҡатып ҡалыу, хәрәкәтһеҙ ҡалыу

**ОКО́ШКО** *с*; *разг., уменьш. от* **окно́**

**ОКРА́ИНА** *ж* **1.** сит; **на окра́ине го́рода** ҡала ситендә **2.** (*пограничная область*) сик

**ОКРА́ИННЫЙ,** -ая, -ое ситтәге, ситендәге; **окра́инный райо́н го́рода** ҡала ситендәге район

**ОКРА́СИТЬ** *сов. что* **1.** (*покрыть краской*) буяу, маныу; **окра́сить ткань** тауарҙы буяу; **окра́сить в си́ний цвет** күк төҫкә буяу **2.** (*сделать красным — о лучах солнца, огне и т.п.*) ҡыҙғылт төҫ биреү, ҡыҙартыу **3.** *перен.* (*придать особый тон, оттенок*) сағылыш биреү, төҫ индереү, биҙәү

**ОКРА́СИТЬСЯ** *сов.* буялыу, манылыу

**ОКРА́СКА** *ж* **1.** *см.* **окра́сить**; **окра́ска воло́с** сәс буяу **2.** төҫ; **окра́ска молодо́й и́вы** йәш тал төҫө **3.** *перен.* үҙенсәлек, төҫ, төҫмөр; **прида́ть выступле́нию полити́ческую окра́ску** сығышҡа сәйәси төҫ биреү; **стилисти́ческая окра́ска сло́ва** һүҙҙең стилистик төҫмөрө

**ОКРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **окра́сить**

**ОКРА́ШИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **окра́ситься** **2.** *страд. от* **окра́шивать**

**ОКРЕ́ПНУТЬ** *сов.* **1.** нығыу, нығыныу, сынығыу; **лёд на реке́ окре́п** йылғала боҙ нығынды; **де́ти вы́росли и окре́пли** балалар үҫеп нығынды; **хозя́йство окре́пло** хужалыҡ нығыны **2.** (*усилиться*) көсәйеү; **ве́тер окре́п** ел көсәйҙе

**ОКРЕСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого*; *рел.* суҡындырыу **2.** *кого-что, кем-чем*; *разг.* (*назвать*) атау, исем биреү (тағыу)

**ОКРЕ́СТНОСТЬ** *ж* тирә-яҡ, тирә-йүн, әйләнә-тирә; **окре́стность го́рода** ҡаланың тирә-яғы

**ОКРЕ́СТНЫЙ,** -ая, -ое тирә-яҡтағы, тирә-йүндәге, әйләнә-тирәләге; **окре́стные места́** тирә-яҡтағы урындар

**О́КРИК** *м* **1.** *см.* **о́клик** **2.** ҡысҡырған (аҡырған, екергән) тауыш, аҡырыныу, екеренеү

**ОКРИ́КНУТЬ** *сов. кого* өндәшеү, ҡысҡырып саҡырыу

**ОКРОВА́ВИТЬ** *сов. кого-что* ҡанға буяу (батырыу), ҡанатыу; **окрова́вить но́гу** аяҡты ҡанатыу

**ОКРОВА́ВИТЬСЯ** *сов.* ҡанға буялыу (батыу)

**ОКРОВА́ВЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **окрова́вить** **2.** *прил.* ҡанлы, ҡанланған, ҡанға батҡан; **окрова́вленный бинт** ҡанлы бинт

**ОКРО́Л** *м*; *спец.* балалау (*ҡуянға ҡарата*)

**ОКРОПИ́ТЬ** *сов. кого-что* бөркөү, һибеү; **окропи́ть водо́й** һыу бөркөү

**ОКРОПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **окропи́ть**

**ОКРО́ШКА** *ж* **1.** окрошка (*кеүәҫкә төрлө йәшелсә һәм ит турап әҙерләнгән һыуыҡ аш*) **2.** *разг.* (*беспорядочная смесь*) ҡатнашма, боламыҡ

**О́КРУГ** *м* округ; **администрати́вный о́круг** административ округ; **вое́нный о́круг** хәрби округ; **избира́тельный о́круг** һайлау округы

**ОКРУ́ГА** *ж*; *разг.* әйләнә-тирә, тирә-яҡ, тирә-йүн

**ОКРУГЛЕ́НИЕ** *с см.* **округли́ть**, **округли́ться**

**ОКРУГЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **округли́ть** **2.** *прил.*; *перен.* түңәрәкләнгән; **округлённый счёт** түңәрәкләнгән иҫәп

**ОКРУГЛЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* түңәрәкләнеү, түңәрәкләнеп китеү

**ОКРУГЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*сделать круглым*) түңәрәкләү, түңәрәкләндереү; **округли́ть глаза́** күҙҙе түңәрәкләндереү **2.** (*выразить в круглых цифрах*) түңәрәкләү, түңәрәкләп иҫәпләү; **округли́ть счёт** иҫәпте түңәрәкләү **3.** *перен., разг.* күбәйтеү, үҫтереү; **округли́ть капита́л** капиталды күбәйтеү

**ОКРУГЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** түңәрәкләнеү; **глаза́ округли́лись** күҙҙәре түңәрәкләнде **2.** (*стать полным*) түңәрәкләнеү, йомролоныу, тулыланыу; **пле́чи её округли́лись** уның яурындары тулыланды **3.** *перен., разг.* күбәйеү, үҫеү; **капита́л округли́лся** капитал күбәйҙе

**ОКРУ́ГЛОСТЬ** *ж* **1.** түңәрәклек, йомролоҡ **2.** (*выпуклость*) ҡабарынҡылыҡ; **окру́глости ли́нзы** линзаның ҡабарынҡылығы

**ОКРУ́ГЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** түңәрәк, йомро; **окру́глое лицо́** түңәрәк йөҙ **2.** (*плавный — о движениях*) талғын, һалмаҡ, йомшаҡ, шыма; **окру́глый жест** талғын ҡул хәрәкәте **3.** *перен., разг.* тулы, тамамланған; **окру́глые фра́зы** тамамланған фразалар

**ОКРУГЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **округли́ть**

**ОКРУГЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **округли́ться** **2.** *страд. от* **округля́ть**

**ОКРУЖА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **окружи́ть** **2.** *кого-что* уратып алыу, тирәһендә (эргәһендә, янында) булыу (тороу), араһында йәшәү; **парк окружа́л дом** парк өйҙө уратып алған; **её окружа́ют друзья́** ул дуҫтары араһында йәшәй **3.** *кого*; *перен.* солғау, солғап алыу; **э́то де́ло окружено́ та́йной** был эш сер менән солғанған

**ОКРУЖА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **окружа́ть** **2.** *прил.* тирәләге, тирә-яҡтағы, яҡын-тирәләге; **окружа́ющая обстано́вка** әйләнә-тирәләге хәл **3.** *в знач. сущ.* **окружа́ющее** *с* солғап (әйләндереп) алған нәмә, тирә-яҡтағы (әйләнә-тирәләге) нәмә **4.** *в знач. сущ.* **окружа́ющие** *мн.* тирәләгеләр, тирәләге кешеләр, тирә-яҡтағылар

**ОКРУЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **окружи́ть — окружа́ть 2.** (*окружающая обстановка, условия существования кого-чего-л.*) солғаныш, шарттар; **географи́ческое окруже́ние** географик шарттар; **вражде́бное окруже́ние** дошман солғанышы **3.** (*окружающие лица, среда*) даирә, мөхит; **литерату́рное окруже́ние** әҙәби даирә **4.** (*окрестность*) тирә-яҡ, тирә-йүн, әйләнә-тирә **5.** *воен.* ҡамау, ҡамалыш; **попа́сть в окруже́ние** ҡамауға эләгеү, ҡамауҙа ҡалыу ♦ **в окруже́нии** *кого-чего* (*в знач. предлога*) *кемдәрҙеңдер* араһында, *кем менәндер* бергә

**ОКРУЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡамап (солғап, уратып, әйләндереп, һырып) алыу; **окружи́ть врага́** дошманды ҡамап алыу **2.** *кем-чем, кого*; *перен.* уратып (солғап) алыу, солғау; **окружи́ть себя́ надёжными людьми́** үҙеңде ышаныслы кешеләр менән уратып алыу; **окружи́ть же́нщин внима́нием** ҡатын-ҡыҙҙы иғтибар менән солғау

**ОКРУЖНО́Й,** -ая, -ое **1.** округ ...ы; **окружна́я избира́тельная коми́ссия** округ һайлау комиссияһы **2.** әйләнәләге, урап үтә торған; **окружна́я желе́зная доро́га** урап үтә торған тимер юл; **окружно́й лес** әйләнәләге урман

**ОКРУ́ЖНОСТЬ** *ж* **1.** әйләнә, урата; **окру́жность ду́ба** имәндең әйләнәһе **2.** түңәрәк; **выводи́ть ци́ркулем окру́жность** циркуль менән түңәрәк һыҙыу

**ОКРУТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что, чем*; *разг.* урау, уратып һалыу, урап (сырмап) ҡуйыу; **окрути́ть ко́су вокру́г головы́** сәс толомон башҡа уратып ҡуйыу **2.** *кого*; *уст., прост.* (*обвенчать*) никах уҡыу

**ОКРЫЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **окрыли́ть 2.** *прил.*; *бот., зоол.* ҡанатланған, ҡанаты булған; **окрылённое се́мя** ҡанатланған орлоҡ **3.** *прил.*; *перен.* ҡанатланған, дәртләнгән; **окрылённый ра́достью** шатлыҡ менән ҡанатланған

**ОКРЫЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡанатландырыу, дәртләндереү, рухландырыу; **успе́х окрыли́л его́** уңыш уны ҡанатландырҙы

**ОКРЫЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *бот., зоол.* ҡанатланыу **2.** *перен.* ҡанатланыу, дәртләнеү, рухланыу

**ОКРЫЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **окрыли́ть**

**ОКРЫЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **окрыли́ться**

**ОКСИДИ́РОВАНИЕ** *с см.* **оксиди́ровать**

**ОКСИДИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *тех.* оксидлау, оксидлаштырыу

**ОКСИДИРО́ВКА** *ж*; *тех.* **1.** *см.* **оксиди́ровать 2.** (*оксидированный слой*) оксидлаштырылған ҡатлам

**ОКТА́ВА** *ж* октава (**1.** *муз. гамманың һигеҙенсе тоны һәм шуға тиклемге ара* **2.** *муз. иң ҡалын бас* **3.** *әҙ. шиғырҙа махсус һигеҙ юллы рифмалы строфа*)

**ОКТА́Н** *м*; *хим.* октан

**ОКТА́ЭДР** *м*; *мат.* октаэдр, һигеҙ ҡыр

**ОКТЯ́БРЬ** *м* октябрь; **ме́сяц октя́брь** октябрь айы

**ОКТЯ́БРЬСКИЙ,** -ая, -ое октябрь ...ы; **октя́брьские дожди́** октябрь ямғырҙары

**ОКУ́КЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **оку́клиться**

**ОКУ́КЛИТЬСЯ** *сов.*; *зоол.* ҡурсаҡланыу, ҡурсаҡҡа әйләнеү (*бөжәккә ҡарата*)

**ОКУЛИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что*; *сад.* бөрө ялғау (*емеш ағасына ҡарата*)

**ОКУЛИРО́ВКА** *ж см.* **окули́ровать**

**ОКУЛИ́СТ** *м* күҙ табибы (врачы)

**ОКУЛЬТУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **окульту́рить**

**ОКУЛЬТУ́РИТЬ** *сов. что*; *с.-х.* культуралаштырыу; **окульту́рить ди́кую я́блоню** ҡырағай алмағасты культуралаштырыу

**ОКУЛЯ́Р** м окуляр (*оптик ҡорамал быялаһы*)

**ОКУНА́ТЬ** *несов. см.* **окуну́ть**

**ОКУНА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **окуну́ться 2.** *страд. от* **окуна́ть**

**ОКУНУ́ТЬ** *сов. кого-что* сумдырып (манып, тығып) алыу; **окуну́ть ребёнка в во́ду** баланы һыуға сумдырып алыу

**ОКУНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сумыу, сумып алыу; **окуну́ться в во́ду** һыуға сумыу **2.** *перен.* күмелеү, сумыу, бирелеү; **окуну́ться в рабо́ту** эшкә сумыу

**О́КУНЬ** *м* алабуға

**ОКУПА́ЕМОСТЬ** *ж* хаҡы сығыу, сығымы ҡапланыу

**ОКУПА́ТЬ** *несов. см.* **окупи́ть**

**ОКУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **окупи́ться**

**ОКУПИ́ТЬ** *сов. что* хаҡын (сығымын) ҡаплау

**ОКУПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** хаҡы сығыу, сығымы ҡапланыу **2.** *перен., разг.* үҙен аҡлау, хаҡын кире ҡайтарыу; **стара́ния оку́пятся** тырышлыҡтар үҙен аҡлар

**ОКУ́РИВАНИЕ** *с см.* **оку́ривать**

**ОКУ́РИВАТЬ** *несов. см.* **окури́ть**

**ОКУРИ́ТЬ** *сов. кого-что* төтәсләү, ыҫлау; **окури́ть я́блони** алмағастарҙы төтәсләү

**ОКУ́РОК** *м* төпсөк, тәмәке (папирос) төпсөгө

**ОКУ́ТАТЬ** *сов. кого-что* **1.** *чем* урау, төрөү; **оку́тать платко́м** яулыҡ менән урау **2.** *перен.* солғап (уратып, сорнап, ҡаплап) алыу; **зе́млю оку́тал тума́н** ерҙе томан ҡаплап алды ♦ **оку́тано та́йной** *что* сер булып тороу, сергә сорналыу

**ОКУ́ТАТЬСЯ** *сов.* **1.** ураныу, төрөнөү; **оку́таться пухо́вой ша́лью** дебет шәлгә төрөнөү **2.** *перен.* ҡапланыу, солғаныу, солғап (ҡаплап) алыныу; **оку́таться тума́ном** томан менән ҡапланыу

**ОКУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **оку́тать**

**ОКУ́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оку́таться 2.** *страд. от* **оку́тывать**

**ОКУ́ЧИВАНИЕ** *с см.* **оку́чивать**

**ОКУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **оку́чить**

**ОКУ́ЧИТЬ** *сов. что* күмеү; **оку́чить карто́фель** картуф күмеү

**ОКУ́ЧКА** *ж*; *разг. см.* **оку́чить** — **оку́чивать**

**ОКУ́ЧНИК** *м* күмгес, күмдергес (*корал*)

**ОЛА́ДЬЯ** *ж* әсе ҡоймаҡ

**ОЛЕА́НДР** *м* олеандр (*мәңге йәшел йылы яҡ ҡыуағы*)

**ОЛЕДЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** *см.* **обледене́лый 2.** (*окоченевший*) туңған, туңып ҡатҡан

**ОЛЕДЕНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *см.* **обледене́ть 2.** (*окоченеть*) боҙ кеүек булыу, өшөп ҡатыу (туңыу)

**ОЛЕИ́Н** *м*; *хим.* олеин (*төҫһеҙ, еҫһеҙ, берниндәй тәме булмаған шыйыҡ техник кислота*)

**ОЛЕИ́НОВЫЙ: олеи́новая кислота́** олеин кислотаһы

**ОЛЕНЕВО́Д** *м* болан үрсетеүсе (*белгес*)

**ОЛЕНЕВО́ДСТВО** *с* болансылыҡ, болан аҫырау

**ОЛЕНЕВО́ДЧЕСКИЙ,** -ая, -ое болансылыҡ …ы, болан аҫырау …ы; **оленево́дческая фе́рма** болансылыҡ фермаһы

**ОЛЕНЁНОК** *м* болан балаһы

**ОЛЕ́НИЙ,** -ья, -ье **1.** болан …ы; **оле́нья шку́ра** болан тиреһе **2.** болан тиреһенән эшләнгән (тегелгән); **оле́нья ша́пка** болан тиреһенән тегелгән бүрек ♦ **оле́ний мох** *бот.* болан мүге

**ОЛЕ́НИНА** и **ОЛЕНИ́НА** *ж* болан ите

**ОЛЕ́НЬ** *м* болан; **оле́ниха**, **олени́ха**, **оленуха** *ж* инә болан

**ОЛЕОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое олеография …ы; **олеографи́ческий спо́соб** олеография ысулы

**ОЛЕОГРА́ФИЯ** *ж* олеография (*һүрәт баҫыуҙың боронғо ысулы һәм шул ысул менән баҫылған һүрәт*)

**ОЛИ́ВА** и **ОЛИ́ВКА** *ж* зәйтүн

**ОЛИ́ВКОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** зәйтүн …ы; **оли́вковая ро́ща** зәйтүн ҡыуаҡлығы; **оли́вковое ма́сло** зәйтүн майы **2.** (*о цвете*) һарғылт йәшел, зәйтүн төҫөндәге

**ОЛИГАРХИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое олигархия …ы; **олигархи́ческий строй** олигархия ҡоролошо

**ОЛИГА́РХИЯ** *ж* олигархия (**1.** *антик дәүерҙәге һәм Урта быуаттағы бай юғары ҡатлам һәм шуларҙың идараһы* **2.** *финанс магнаттарҙан торған бәләкәй төркөмдөң сәйәси һәм иҡтисади хакимлығы һәм шул төркөм үҙе*)

**ОЛИ́МП** *м* **1.** *миф.* Олимп (*боронғо грек мифологияһында аллалар йәшәгән тау һәм уларҙың йыйылышы, йыйыны*) **2.** *перен., шутл.* олимп; **литерату́рный оли́мп** әҙәби олимп

**ОЛИМПИА́ДА** *ж* олимпиада; **Бе́лая олимпиа́да** Аҡ олимпиада; **математи́ческая олимпиа́да** математика олимпиадаһы

**ОЛИМПИ́ЕЦ** *м* **1.** *миф.* олимпсы **2.** *разг.* олимпиадасы, олимпиада уйынсыһы

**ОЛИМПИ́ЙСКИЙ,** -ая, -ое **1.** *миф.* Олимп …ы; **Олимпи́йские бо́ги** Олимп аллалары **2.** олимпиада …ы; **Олимпи́йский комите́т Росси́и** Рәсәйҙең олимпиада комитеты; **Олимпи́йские и́гры** Олимпиада уйындары ♦ **олимпи́йское споко́йствие** ғәжәйеп тыныслыҡ, һалҡын ҡанлылыҡ

**ОЛИ́ФА** *ж* әлиф

**ОЛИЦЕТВОРЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **олицетвори́ть 2.** *чего* (*воплощение*) (йәнле) кәүҙәләнеш; **быть олицетворе́нием доброты́** изгелектең кәүҙәләнеше булыу

**ОЛИЦЕТВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* кәүҙәләндереү, һүрәтләү, күрһәтеү

**ОЛИЦЕТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **олицетвори́ть**

**О́ЛОВО** *с* аҡ ҡурғаш (*химик элемент, металл*)

**ОЛОВЯ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** аҡ ҡурғаш …ы; **оловя́нный сли́ток** аҡ ҡурғаш ҡойолмаһы; **оловя́нная руда́** аҡ ҡурғаш мәғдәне **2.** аҡ ҡурғаштан яһалған, (аҡ) ҡурғаш; **оловя́нный подсве́чник** аҡ ҡурғаш шәмдәл; **оловя́нные солда́тики** ҡурғаш (уйынсыҡ) һалдаттар **3.** аҡ ҡурғаш төҫөндәге, аҡ ҡурғаш төҫлө; **оловя́нные ка́пли** аҡ ҡурғаш төҫөндәге тамсылар **4.** *перен.* (*о глазах, взгляде*) тоноҡ; **оловя́нный взгляд** тоноҡ ҡараш

**О́ЛУХ** *м*; *прост.* аңра, ахмаҡ, тинтәк, мәнһеҙ, кәбәк баш ♦ **о́лух царя́ небе́сного** шыр тиле, аңра

**ОЛЬХА́** *ж* ерек; **ольха́ бе́лая** аҡ ерек; **ольха́ чёрная** ҡара ерек

**ОЛЬХО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** ерек …ы; **ольхо́вая ро́ща** ерек ҡыуаҡлығы **2.** ерек, еректән эшләнгән; **ольхо́вый шкаф** ерек шкаф

**ОЛЬША́НИК** *м* ереклек, ерек урманы

**ОМ** *м*; *физ.* ом (*электр ҡаршылығын үлсәү берәмеге*)

**ОМА́Р** *м* омар (*эре диңгеҙ ҡыҫалаһы*)

**ОМЕ́ГА** *ж* омега (*грек алфавитында иң һуңғы хәреф*)

**ОМЕ́ЛА** *ж* омела (*паразит үҫемлек*)

**ОМЕРЗЕ́НИЕ** *с* ерәнеү, сирҡаныу; **чу́вство омерзе́ния** ерәнеү тойғоһо

**ОМЕРЗЕ́ТЬ** *сов. кому*; *разг.* ерәнес булыу, ерәнеү тойғоһо тыуҙырыу

**ОМЕРЗИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ерәнес, сирҡаныс; **омерзи́тельный за́пах** ерәнес еҫ **2.** *разг.* үтә насар, яман, хөрт; **омерзи́тельное настрое́ние** хөрт кәйеф; **омерзи́тельная пого́да** үтә насар көн

**ОМЕРТВЕ́ЛОСТЬ** *ж* **1.** үлек (үле), йәнһеҙлек **2.** *перен.* йәнһеҙлек, һүнгәнлек

**ОМЕРТВЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** үле, үлгән; **омертве́лые кле́тки** үле күҙәнәктәр **2.** *перен.* хәрәкәтһеҙ, йәнһеҙ, һүнгән, тынып ҡалған; **омертве́лые глаза́** һүнгән күҙҙәр

**ОМЕРТВЕ́НИЕ** *с см.* **омертве́ть**; **омертве́ние тка́ней** туҡымаларҙың үлеүе

**ОМЕРТВЕ́ТЬ** *сов.* **1.** һиҙеү һәләтен юғалтыу, бер ни һиҙмәү, үлеү, үлер хәлгә килеү;

**стопа́ омертве́ла** табан бер ни һиҙмәй **2.** *перен.* ҡатып ҡалыу, өнһөҙ ҡалыу; **омертве́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан өнһөҙ ҡалыу **3.** *перен.* тынып (бушап) ҡалыу; **вокза́л омертве́л** вокзал тынып ҡалған

**ОМЕРТВИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*вызвать омертвление*) һиҙеү һәләтен бөтөрөү; үлеккә әйләндереү **2.** *перен.* йәнһеҙгә әйләндереү, һүндереү, туҡтатыу; **омертви́ть живо́е де́ло** йәнле эште туҡтатыу **3.** *перен.* ҡулланыуҙан туҡтау, хәрәкәтһеҙ ятҡырыу; **омертви́ть капита́л** капиталды хәрәкәтһеҙ ятҡырыу

**ОМЕРТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **омертви́ть**

**ОМЁТ** *м* һалам эҫкерте

**ОМЕЩА́НИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* мещанға әйләнеү, мещанланыу

**ОМЛЕ́Т** *м* йомортҡа тәбейәһе, омлет

**ОМОВЕ́НИЕ** *с* тәһәрәт алыу

**ОМОЛА́ЖИВАНИЕ** *с см.* **омолоди́ть**

**ОМОЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **омолоди́ть**

**ОМОЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **омолоди́ться 2.** *страд. от* **омола́живать**

**ОМОЛОДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* йәшәртеү, йәшәртеп ебәреү; **улы́бка омолоди́ла его́ лицо́** йылмайыу уның йөҙөн йәшәртеп ебәрҙе; **омолоди́ть органи́зм** организмды йәшәртеү; **омолоди́ть организа́цию** ойошманы йәшәртеү; **омолоди́ть виногра́дные кусты́** виноград ҡыуаҡтарын йәшәртеү

**ОМОЛОДИ́ТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* йәшәреү, йәшәреп китеү

**ОМОЛОЖЕ́НИЕ** *с*; *биол.* йәшәртеү, йәшәреү

**ОМО́НИМ** *м*; *лингв.* омоним

**ОМОНИ́МИКА** *ж* омонимика (**1.** *лингв. берәй телдең омонимдары* **2.** *лексикологияның омонимдарҙы өйрәнеү бүлеге*)

**ОМОНИМИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое *лингв.* омоним, омонимик; **омоними́ческие слова́** омонимик һүҙҙәр

**ОМОНИ́МИЯ** *ж*; *лингв.* омонимия

**ОМОЧИ́ТЬ** *сов. что* еүешләү, сылатыу, һыулау; **омочи́ть глаза́ слеза́ми** күҙҙе йәшкә сылатыу

**ОМРАЧА́ТЬ** *несов. см.* **омрачи́ть**

**ОМРАЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **омрачи́ться 2.** *страд. от* **омрача́ть**

**ОМРАЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* ҡайғыға һалыу (ҡалдырыу), хәсрәткә төшөрөү, кәйефен боҙоу; **омрачи́ть настрое́ние** кәйефте боҙоу

**ОМРАЧИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡайғыға һалыу, хәсрәтләнеү, ҡараңғыланыу, күңелһеҙләнеү, кәйефе боҙолоу (ҡырылыу); **лицо́ вдруг омрачи́лось** йөҙө ҡапыл ҡараңғыланды

**О́МУЛЬ** *м* омуль (*балыҡ*)

**О́МУТ** *м* **1.** (*яма на дне реки или озера*) ятыу **2.** (*водоворот*) упҡын, сөңгөл, өйөрмә **3.** *перен.* (*то, что затягивает*) батҡаҡ, һаҙлыҡ; **в о́муте жи́зни** тормош һаҙлығында ♦ **в ти́хом о́муте че́рти во́дятся** йыуаштан йыуан сыға

**ОМША́НИК** *м*; *пчел.* умарта баҙы

**ОМЫВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **омы́ть 2.** *что* (йылға, диңгеҙ) әйләндереп (уратып) алыу, (тулҡын, һыу ағышы) йыуып тороу; **мо́ре омыва́ет о́стров** утрауҙы диңгеҙ уратып алған

**ОМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **омы́ться 2.** *страд. от* **омыва́ть** 2

**ОМЫ́ТЬ** *сов. кого-что*; *книжн. см.* **обмы́ть**

**ОМЫ́ТЬСЯ** *сов.*; *книжн. см.* **обмы́ться**

**ОН** *м* (его, ему, его, им, о нём) *мест.* ул

**ОНА** *ж* (её, ей, её, ею и ей, о ней) *мест. см.* **он**

**ОНА́ГР** *м* ҡырағай ишәк, онагр

**ОНАНИ́ЗМ** *м* онанизм, ҡул зинаһы

**ОНДА́ТРА** *ж* ондатра (*ҡиммәтле тиреле йәнлек*)

**ОНЕМЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*немой*) телһеҙ, теле бәйләнгән **2.** *разг.* ойоған, ҡатып ҡалған; **онеме́лая нога́** ойоған аяҡ

**ОНЕМЕ́НИЕ** *с см.* **онеме́ть**

**ОНЕМЕ́ТЬ** *сов.* **1.** телдән (ҡалыу) яҙыу; **онеме́ть от стра́ха** ҡурҡыуҙан телдән яҙыу **2.** ойоу, ҡатып ҡалыу; **рука́ онеме́ла** ҡул ойоно

**ОНИ́** *мн.* (их, им, их, ими, о них) *мест. см.* **он**

**О́НИКС** *м*; *мин.* оникс (*аҡыҡтың бер төрө*)

**ОНКО́ЛОГ** *м* онколог, онкология белгесе

**ОНКОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое онкология ...ы; **онкологи́ческий институ́т** онкология институты; **онкологи́ческий диспансе́р** онкология диспансеры

**ОНКОЛО́ГИЯ** *ж*; *мед.* онкология (*яман шеш ауырыуҙарын һәм уларҙы дауалау ысулдарын өйрәнеү фәне*)

**ОНО́** *с* (его, ему, его, им, о нём) *мест.* **1.** *см.* **он 2.** *разг.* (*в знач. мест. "это"*) ул, был; **бу́дет ли оно́ хорошо́?** ул һәйбәт булырмы икән? **3.** *в знач. частицы*; *разг.* (*усиливает, выделяет слово или высказывание*) уныһы шулай, тимәк; **оно, коне́чно, так** уныһы, әлбиттә, шулай

**ОНОМА́СТИКА** *ж*; *лингв.* **1.** ономастика, яңғыҙлыҡ исемдәр **2.** ономастика (*лингвистикала яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнә торған бүлек*)

**ОНТОГЕНЕ́З** *м*; *биол.* онтогенез (*организмдың яралыуҙан алып йәшәү ахырына тиклем индивидуаль үҫеше*)

**ОНУ́ЧА** *ж* силғау, ыштыр

**О́НЫЙ,** -ая, -ое *мест.*; *уст.* **1.** (*тот*) анау, ул, теге, шул; **в о́ный день** теге көндө **2.** (*вышеупомянутый*) юғарыла әйтелгән, иҫкә алынған

**ОПАДА́ТЬ** *несов. см.* **опа́сть**

**ОПА́ЗДЫВАТЬ** *несов. см.* **опозда́ть**

**ОПА́ИВАТЬ** *несов. см.* **опои́ть**

**ОПА́Л** *м*; *мин.* аҡ аҡыҡ; **кольцо́ с опа́лом** аҡ аҡыҡ ҡашлы йөҙөк

**ОПА́ЛА** *ж* **1.** *ист.* батша йәбере (язаһы); **быть в опа́ле** батша йәберендә булыу (йөрөү) **2.** *перен.* (*немилость*) күрә алмаусанлыҡ, яратмау

**ОПА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **опали́ть**

**ОПАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* өтөү, өтәҫләү; **опали́ть ку́рицу** тауыкты өтөү **2.** *что* көйҙөрөү, яндырыу, көйҙөрөп (яндырып) алыу; **опали́ть бро́ви** ҡашты көйҙөрөү **3.** *что* (*иссушить кожу*) ел ашау, елгә ярылыу, ҡояшҡа яныу; **ве́тром ему́ опали́ло лицо́** уның бите елгә ярылған

**ОПАЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бешеү, яныу

**ОПА́ЛОВЫЙ,** -ая, -ое *мин.* **1.** аҡ аҡыҡ ...ы; **опа́ловый ка́мень** аҡ аҡыҡ ташы **2.** аҡ аҡыҡ, аҡ аҡыҡтан яһалған; **опа́ловый пе́рстень** аҡ аҡыҡ йөҙөк **3.** (*о цвете*) аҡ аҡыҡ төҫлө

**ОПА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое батша йәберенә (язаһына) дусар булған; **опа́льный дворяни́н** батша йәберенә дусар булған дворян

**ОПА́МЯТОВАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* аңға (иҫкә, һушҡа) килеү, айныу

**ОПА́РА** *ж* әсетке, ҡамыр башы; **поста́вить опа́ру** әсетке ҡуйыу

**ОПА́РНИК** *м* икмәк күнәге

**ОПАРШИ́ВЕТЬ** *сов.* таҙланыу, таҙға әйләнеү, ҡутырлап бөтөү, ҡорсаңғыға батыу

**ОПАСА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *кого-чего* и *с неопр.* (*бояться*) ҡурҡыу, шикләнеү, хәүефләнеү **2.** *чего* и *с неопр.* ҡурҡыу, һаҡланыу; **опаса́ться сквозняко́в** үтә елдән һаҡланыу

**ОПАСЕ́НИЕ** *с* шик, шом, шөбһә, хәүеф; **вы́разить опасе́ние** шик белдереү

**ОПА́СКА** *ж*; *разг.* ҡурҡыу, шикләнеү, һаҡлыҡ; **погля́дывать с опа́ской** шикләнеп ҡарау; **ходи́ть с опа́ской** һаҡлыҡ менән йөрөү

**ОПА́СЛИВЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һаҡ, ҡурҡаҡ, ҡурҡырлыҡ, шикләнерлек; **опа́сливый пешехо́д** һаҡ йәйәүле; **опа́сливая мысль** шикләнерлек уй

**ОПА́СНОСТЬ** *ж* ҡурҡыныс, хәүеф-хәтәр; **подверга́ться опа́сностям** хәүеф-хәтәргә дусар ителеү

**ОПА́СНЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡыныс(лы), хәүефле, хәүеф-хәтәрле, хәтәр; **опа́сная доро́га** хәүеф-хәтәрле юл; **опа́сный престу́пник** хәтәр енәйәтсе

**ОПА́СТЬ** *сов.* **1.** ҡойолоу, ҡойолоп төшөү; **ли́стья опа́ли** япраҡтар ҡойолдо **2.** кәмеү, ҡайтыу; **о́пухоль опа́ла** шеш ҡайтты **3.** *разг.* ябығыу, тартылыу; **ло́шадь опа́ла те́лом** ат ябыҡты

**ОПАХА́ТЬ** *сов. что* уратып һөрөү, тирәләй һөрөп сығыу; **опаха́ть межу́** ыҙанды тирәләй һөрөп сығыу

**ОПА́ХИВАТЬ** *несов. см.* **опаха́ть**

**ОПЕ́КА** *ж* **1.** *юр.* бағымсылыҡ, опека (*балаларҙы, психик ауырыуҙарҙы, ҡарттарҙы тәрбиәләүгә алыу менән бергә уларҙың шәхси һәм милек хоҡуҡтарын һаҡлауҙы ҡайғыртыу*); **учреди́ть опе́ку** опека ойоштороу **2.** (*лица или учреждения*) бағымсылар, опека, опекунлыҡ, опекундар **3.** (*забота, попечение*) ҡарау, ҡайғыртыу, хәстәрлек; **роди́тельская опе́ка** ата-әсә хәстәрлеге ♦ **междунаро́дная опе́ка** халыҡ-ара опека (*ҡайһы бер бойондороҡло илдәрҙең Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы ҡушыуы һәм күҙәтеүе аҫтында ғәмәлләштерелгән идараһы*)

**ОПЕКА́ТЬ** *несов. кого-что* **1.** *юр.* (*осуществлять опеку*) бағыу, опекунлыҡ итеү, опекаға алыу; **опека́ть малоле́тних** кесе йәштәгеләрҙе опекаға алыу **2.** *перен.* хәстәрлек күреү, ҡарау, ҡурсалау, ҡайғыртыу; **чересчу́р опека́ть ребёнка** баланы кәрәгенән артыҡ ҡурсалау

**ОПЕКУ́Н** *м* и **ОПЕКУ́НША** *ж* опекун, опекаға алған кеше, бағымсы

**ОПЕКУ́НСКИЙ,** -ая, -ое опекун ...ы, опекунлыҡ ...ы, бағымсылыҡ ...ы; **опеку́нское пра́во** опекун хоҡуҡтары; **опеку́нские дела́** опекунлыҡ эштәре

**ОПЕКУ́НСТВО** *с* опекунлыҡ, бағымсылыҡ; **возложи́ть опеку́нство на ста́ршего бра́та** опекунлыҡты өлкән ағайға йөкмәтеү

**ОПЁНОК** *м* баллы бәшмәк

**О́ПЕРА** *ж* опера ♦ **из друго́й о́перы**; **не из той о́перы** дуға менән бесән сабыу (*һөйләнгән һүҙгә бөтөнләй ҡағылышы булмаған хәбәргә ҡарата*)

**ОПЕРАТИ́ВКА** *ж*; *разг.* оперативка, оператив кәңәшмә

**ОПЕРАТИ́ВНИК** *м*; *разг.* оперативник (*енәйәттәрҙе асыу һәм булдырмау эштәре менән шөғөлләнеүсе милиция хеҙмәткәре*)

**ОПЕРАТИ́ВНОСТЬ** *ж* оперативлыҡ, етеҙлек, өлгөрлөк; **прояви́ть операти́вность** өлгөрлөк күрһәтеү; **операти́вность в рабо́те** эштәге етеҙлек

**ОПЕРАТИ́ВНЫЙ,** -ая, -ое **1.** операция ...ы; **удали́ть о́пухоль операти́вным путём** шеште операция юлы менән алып ташлау **2.** оператив; **операти́вная сво́дка** оператив хәбәр; **операти́вный отде́л** оператив бүлек; **операти́вное руково́дство** оператив етәкселек

**ОПЕРА́ТОР** *м* оператор

**ОПЕРА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое оператор ...ы; **опера́торская рабо́та** оператор эше

**ОПЕРАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** операция ...ы; **операцио́нный план** операция планы **2.** *в знач. сущ.* **операцио́нная** *ж* операция бүлмәһе

**ОПЕРА́ЦИЯ** *ж* операция (**1.** *хирургия юлы менән күрһәтелгән ярҙам* **2.** *дөйөм бер планды үтәүгә йүнәлдерелгән хәрби хәрәкәт* **3.** *сауҙа, финанс, почта һ.б. хеҙмәте буйынса башҡарылған эш* **4.** *производствола технологик процестың тамам булған бер өлөшө*)

**ОПЕРЕДИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям.*, *перен.* уҙыу, уҙып китеү; **опереди́ть однокла́ссников** класташтарҙы (синыфташтарҙы) уҙып китеү

**ОПЕРЕЖА́ТЬ** *несов. см.* **опереди́ть**

**ОПЕРЕЖЕ́НИЕ** *с см.* **опереди́ть**; **опереже́ние гра́фика** графиктан алда барыу

**ОПЕРЕ́НИЕ** *с* ҡош йөнө, ҡауырһын ♦ **хвостово́е опере́ние самолёта** *ав.* самолёттың ҡойроҡ ҡанаты

**ОПЕРЕ́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое оперетта ...ы; **опере́точный актёр** оперетта актёры

**ОПЕРЕ́ТТА** *ж* оперетта

**ОПЕРЕ́ТЬ** *сов. что* терәү, һөйәү, терәп (терәтеп, һөйәп) ҡуйыу; **опере́ть о забо́р** ҡоймаға һөйәү

**ОПЕРЕ́ТЬСЯ** *сов. на кого-что*; *в разн. знач.* терәлеү, һөйәлеү, таяныу; **опере́ться на па́лку** таяҡҡа таяныу; **опере́ться на това́рищей** иптәштәргә таяныу; **опере́ться на фа́кты** фактарға таяныу

**ОПЕРИ́РОВАТЬ 1.** *сов., несов. кого-что* операция яһау; **опери́ровать больно́го** ауырыуға операция яһау **2.** *несов.* хәрби операция алып барыу; **опери́ровать в тылу́ проти́вника** дошман тылында хәрби операция алып барыу **3.** *несов. чем* таяныу, таянып эш итеү; **опери́ровать то́чными све́дениями** теүәл мәғлүмәттәргә таянып эш итеү; **опери́ровать ци́фрами** цифрҙарға таяныу

**ОПЕРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*покрыться оперением*) йөн сығыу, ҡауырһын үҫеү **2.** *перен.* (*возмужать*) буйға етеү, үҫеп етеү **3.** *перен.* (*улучшить материальное положение*) нығыныу, хәлләнеү

**О́ПЕРНЫЙ,** -ая, -ое опера ...ы; **о́перный теа́тр** опера театры

**ОПЕРЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **опери́ться**

**ОПЕЧА́ЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **опеча́лить 2.** *прил.* ҡайғылы, хәсрәтле, ҡайғыға төшкән (ҡалған); **опеча́ленное лицо́** ҡайғылы йөҙ

**ОПЕЧА́ЛИТЬ** *сов. кого-что* ҡайғыға (хәсрәткә) төшөрөү, ҡайғыға ҡалдырыу (һалыу)

**ОПЕЧА́ЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡайғыға төшөү, ҡайғыға (хәсрәткә) ҡалыу **2.** кәйефһеҙлек (күңелһеҙлек) күрһәтеү

**ОПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* мисәтләү, мисәтләп алыу (ҡуйыу); **опеча́тать кварти́ру** фатирҙы мисәтләп ҡуйыу

**ОПЕЧА́ТКА** *ж* баҫма хатаһы; **гру́бая опеча́тка** тупаҫ баҫма хатаһы

**ОПЕЧА́ТЫВАНИЕ** *с см.* **опеча́тать**; **опеча́тывание скла́дов** складтарҙы мисәтләп ҡуйыу

**ОПЕЧА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **опеча́тать**

**ОПЕ́ШИТЬ** *сов.*; *разг.* ҡаушап төшөү (китеү), аптырап китеү; **опе́шить от неожи́данности** көтөлмәгән хәлдән ҡаушап төшөү

**ОПИВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **опи́ться**

**ОПИ́ВКИ** *только мн.*; *разг.* эсемлек ҡалдығы

**О́ПИЙ** *м* эфиүн

**О́ПИЙНЫЙ,** -ая, -ое эфиүн ...ы; **о́пийная насто́йка** эфиүн төнәтмәһе

**ОПИ́ЛКИ** *только мн.* бысҡы вағы (онтағы)

**ОПИРА́ТЬ** *несов. см.* **опере́ть**

**ОПИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опере́ться 2.** *страд. от* **опира́ть**

**ОПИСА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **описа́ть** 1, 2; **2.** (*словесное изображение кого-чего-л.*) тасуирлау, тасуирлама; **описа́ние путеше́ствия** сәйәхәттең тасуирламаһы

**ОПИСА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое тасуирлы, тасуири; **описа́тельный курс бота́ники** ботаниканың тасуирлама курсы

**ОПИСА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*изобразить кого-что-л. в письменной или устной форме*) тасуирлау, тасуирлап (һүрәтләп) биреү **2.** *что* үҙенсәлектәрен яҙыу, яҙып сығыу (алыу); **описа́ть ме́стный го́вор** ерле һөйләштең үҙенсәлектәрен яҙыу **3.** *что* опись яһау, яҙып алыу, яҙыу; **описа́ть иму́щество** милеккә опись яһау **4.** *что*; *мат.* түңәрәкләп (ҡамап) һыҙыу; **описа́ть окру́жность вокру́г квадра́та** квадратты ҡамап түңәрәк һыҙыу

**ОПИСА́ТЬСЯ** *сов.* яҙыуҙа хата ебәреү, яңылыш яҙып ҡуйыу

**ОПИ́СКА** ж яҙыу хатаһы, яҙыуҙағы хата

**ОПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **описа́ть**

**ОПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **описа́ться 2.** *страд. от* **опи́сывать**

**О́ПИСЬ** *ж* **1.** *см.* **описа́ть** 3 — **опи́сывать** 3; **2.** (*список*) опись, исемлек (*әйберҙәр, документтар һ.б.*)

**ОПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* артыҡ (кәрәгенән тыш) эсеү

**О́ПИУМ** *м* эфиүн; **кури́ть о́пиум** эфиүн тартыу

**ОПЛА́КАТЬ** *сов. кого-что* ҡайғырып илау, күҙ йәше түгеү; **опла́кать смерть дру́га** дуҫтың үлеменә ҡайғырып илау

**ОПЛА́КИВАТЬ** *несов. см.* **опла́кать**

**ОПЛА́ТА** *ж* **1.** *см.* **оплати́ть** — **опла́чивать**; **опла́та труда́ рабо́чих** эшселәрҙең хеҙмәтенә түләү **2.** түләү, түләнә торған аҡса; **сде́льная опла́та** эш күләменә ҡарап түләү

**ОПЛАТИ́ТЬ** *сов. что* түләү; **оплати́ть расхо́ды по командиро́вке** командировка сығымдарын түләү; **оплати́ть счёт** счёт буйынса түләү

**ОПЛА́ЧЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **оплати́ть 2.** *прил.* түләгән, түләнгән; **опла́ченный долг** түләнгән бурыс

**ОПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **оплати́ть**

**ОПЛЕВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *разг.* (*покрыть плевками*) төкөрөп бөтөү **2.** *перен.* (*оскорбить*) хур (мәсхәрә) итеү, бысраҡ ташлау

**ОПЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **оплева́ть**

**ОПЛЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* сырмап (уратып, урап) алыу; **оплести́ и́згородь колю́чей про́волокой** кәртәне сәнскеле тимер сым менән уратып алыу **2.** *кого*; *перен.*, *прост.* (*обмануть*) алдау, ултыртыу

**ОПЛЕТА́ТЬ** *несов. см.* **оплести́**

**ОПЛЕУ́ХА** *ж*; *разг.* **1.** сикәгә сабыу (һуғыу), яңаҡҡа ҡундырыу (ялатыу) **2.** *перен.* (*оскорбление*) мәсхәрә, хурлыҡ, кәмһетеү

**ОПЛЕШИ́ВЕТЬ** *сов.*; *разг.* пеләшләнеү, тасайға (ялтасҡа) әйләнеү

**ОПЛОДОТВОРЕ́НИЕ** *с см.* **оплодотвори́ть — оплодотворя́ть**

**ОПЛОДОТВОРИ́ТЬ** *сов. кого-что* аталандырыу, һеркәләндереү (*үҫемлектәрҙе*)

**ОПЛОДОТВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* аталаныу, һеркәләнеү (*үҫемлектәргә ҡарата*)

**ОПЛОДОТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **оплодотвори́ть**

**ОПЛОДОТВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оплодотвори́ться 2.** *страд. от* **оплодотворя́ть**

**ОПЛОМБИРОВА́ТЬ** *сов. что* пломбалау, пломбалап алыу; **опломбирова́ть склад** складты пломбалап алыу

**ОПЛОМБИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **опломбирова́ть**

**ОПЛО́Т** *м*; *высок.* терәк, таяныс

**ОПЛОША́ТЬ** *сов.*; *разг.* хата ебәреү, яңылышлыҡ яһау

**ОПЛО́ШНОСТЬ** *ж* хата, яңылышлыҡ; **испра́вить свою́ опло́шность** үҙеңдең хатаңды төҙәтеү; **допусти́ть опло́шность** хата ебәреү

**ОПЛЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **оплы́ть** I

**ОПЛЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **оплы́ть** II

**ОПЛЫ́ТЬ I** *сов. что* и *без доп.* йөҙөп әйләнеп (урап) сығыу, тирәләй (уратып) йөҙөп сығыу; **оплы́ть о́стров** утрауҙы уратып йөҙөп сығыу

**ОПЛЫ́ТЬ II** *сов.* **1.** (*заплыть жиром*) һимереү, май үреү, шешенеү **2.** (*о свече*) ереп ағыу **3.** (*обрушиться от оползня*) ишелеп (емерелеп) төшөү; **бе́рег оплы́л** яр ишелеп төшкән

**ОПОВЕСТИ́ТЬ** *сов. кого-что* хәбәр итеү, белдереү

**ОПОВЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **оповести́ть**

**ОПОВЕЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **оповести́ть — оповеща́ть 2.** (*известие*) хәбәр, хәбәр итеү

**ОПОГА́НИВАТЬ** *несов. см.* **опога́нить**

**ОПОГА́НИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* бысратыу, бысраҡ яғыу

**ОПО́ЕК** *м* быҙау тиреһе, быҙау күне

**ОПОЗДА́НИЕ** *с* һуңлау, һуңға ҡалыу, кисегеү; **опозда́ние на рабо́ту** эшкә һуңға ҡалыу; **прийти́ без опозда́ния** һуңға ҡалмай килеү

**ОПОЗДА́ТЬ** *сов.* **1.** һуңлау, һуңға ҡалыу, кисегеү; **опозда́ть на уро́к** дәрескә һуңлау **2.** (*своевременно не выполнить*) кисектереү, һуңлатыу; **опозда́ть со спи́сками** исемлектәрҙе һуңлатыу

**ОПОЗНАВА́НИЕ** *с см.* **опознава́ть**

**ОПОЗНАВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое таныу ...ы; **опознава́тельные зна́ки** таныу билдәләре

**ОПОЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **опозна́ть**

**ОПОЗНА́НИЕ** *с см.* **опозна́ть**

**ОПОЗНА́ТЬ** *сов. кого-что* таныу, айырыу; **опозна́ть вра́жеский самолёт** дошман самолётын таныу

**ОПОЗО́РИТЬ** *сов. кого-что* хур (мәсхәрә) итеү, оятҡа ҡалдырыу

**ОПОЗО́РИТЬСЯ** *сов.* хур (оятлы) булыу, оятҡа (мәсхәрәгә) ҡалыу

**ОПОИ́ТЬ** *сов. кого* **1.** артыҡ эсереп зарарлау; **опои́ть ло́шадь** атты артыҡ эсереп зарарлау (*эҫеләгән ат тураһында*) **2.** (*напоить чем-л. хмельным*) иҫерткес эсемлек эсереү **3.** *уст.* (*отравить*) ағыу эсереү

**ОПО́Й** *м*; *вет.* аттың яныуы (*һыу эсергәндән*)

**ОПО́ЙКОВЫЙ,** -ая, -ое быҙау ...ы, быҙау тиреһенән эшләнгән, быҙау күненән тегелгән; **опо́йковая ко́жа** быҙау тиреһенән эшләнгән күн; **опо́йковые сапоги́** быҙау күненән тегелгән итек

**ОПО́КА** *ж* **1.** *тех.* ҡалып, ҡыҫа (*ҡойоу эшендә*) **2.** *геол.* опока (*тау тоҡомо*)

**ОПОЛА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **ополосну́ть**

**ОПОЛЗА́ТЬ I** *несов. см.* **оползти́** I

**ОПОЛЗА́ТЬ II** *несов. см.* **оползти́** II

**О́ПОЛЗЕНЬ** *м* ишелмә, шыуышма, ишелгән (шыуған) ер

**ОПОЛЗТИ́ I** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*вокруг чего-л.*) уратып шыуышыу, имгәкләү **2.** (*огибая что-л.*) шыуышып (имгәкләп) ситләтеп үтеү (үтеп китеү)

**ОПОЛЗТИ́ II** *сов.* ишелеп (емерелеп) төшөү; **сте́ны до́ма оползли́** өй стенаһы (диуары) емерелеп төшкән

**ОПОЛОСНУ́ТЬ** *сов. что* сайҡау, сайҡап алыу; **ополосну́ть кастрю́лю** кәстрүлде сайҡау

**ОПОЛЧА́ТЬСЯ** *несов. см.* **ополчи́ться**

**ОПОЛЧЕ́НЕЦ** *м* ополчин, ополчениела хеҙмәт итеүсе

**ОПОЛЧЕ́НИЕ** *с* ополчение; **наро́дное ополче́ние** халыҡ ополчениеһы

**ОПОЛЧЕ́НСКИЙ,** -ая, -ое ополчение ...ы; **ополче́нские ча́сти** ополчение частары

**ОПОЛЧИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *уст.* (*вооружить*) ҡоралландырыу, ополчение йыйыу **2.** *перен., разг.* (*восстановить против кого-л.*) дошманлаштырыу, ҡаршы ҡотортоу

**ОПОЛЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *уст.* (*вооружиться*) ҡоралланыу, ополчениеға ойошоп, ҡаршы күтәрелеү **2.** (*пойти войной*) һуғышҡа күтәрелеү; **ополчи́ться на врага́** дошманға ҡаршы һуғышҡа күтәрелеү **3.** *перен.* ҡаршы көрәшеү, һөжүм итеү; **ополчи́ться про́тив меща́нства** мещанлыҡҡа ҡаршы көрәшеү

**ОПО́МНИТЬСЯ** *сов.* **1.** аңға (иҫкә, һушҡа) килеү; **опо́мниться по́сле о́бморока** һуш китеүҙән һуң аңға килеү **2.** (*одуматься*) аҡылға килеү, үҙеңде ҡулға алыу

**ОПО́Р: во весь опо́р (скака́ть, мча́ться, нести́сь)** бөтә көскә, йән-фарман (сабыу, йүгереү)

**ОПО́РА** *ж* **1.** таяу, терәү, терәк; **поста́вить опо́ры** терәүҙәр ҡуйыу **2.** *перен.* (*поддержка*) таяныс; **оте́ц — опо́ра семьи́** атай — ғаилә таянысы

**ОПОРА́ЖНИВАТЬ** *несов. см.* **опорожни́ть**

**ОПОРА́ЖНИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опорожни́ться 2.** *страд. от* **опора́жнивать**

**ОПО́РКИ** *мн.* (*ед.* **опо́рок** *м*); *разг.* иҫке итек, туҙған аяҡ кейеме

**ОПО́РНЫЙ,** -ая, -ое таяу ...ы, терәү ...ы, терәк ...ы; **опо́рная ба́лка** терәү бағанаһы; **опо́рный пункт** терәк пункты

**ОПОРОЖНИ́ТЬ** и **ОПОРО́ЖНИТЬ** *сов. что* бушатыу, бушатып ҡуйыу; **опорожни́ть цисте́рну** цистернаны бушатыу

**ОПОРОЖНИ́ТЬСЯ** и **ОПОРО́ЖНИТЬСЯ** *сов.* бушау; **бо́чка опорожни́лась** мискә бушаны

**ОПОРОЖНЯ́ТЬ** *несов. см.* **опорожни́ть**

**ОПОРОЖНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опорожни́ться 2.** *страд. от* **опорожня́ть**

**ОПОРО́С** *м* суҫка балалауы

**ОПОРОСИ́ТЬСЯ** *сов.* балалау (*суҫкаға ҡарата*)

**ОПОРО́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **опоро́чить**

**ОПОРО́ЧИТЬ** *сов. кого-что* исемен һатыу, яманатлы итеү, хурлыҡҡа төшөрөү

**ОПОСРЕ́ДСТВОВАННЫЙ,** -ая, -ое *филос.* **1.** *прич. от* **опосре́дствовать 2.** *прил.* туранан-тура булмаған, берәй нәмә (аша) арҡыры; **опосре́дствованное позна́ние действи́тельности** ысынбарлыкты нимәлер аша танып белеү

**ОПОСРЕ́ДСТВОВАТЬ** *сов., несов. что; филос.* туранан-тура булмау, аша белеү (бирелеү)

**ОПОСТЫ́ЛЕТЬ** *сов.; разг.* биҙҙереү, туйҙырыу, ялҡытыу

**ОПОХМЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* баш төҙәтеү

**ОПОХМЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **опохмели́ться**

**ОПОЧИВА́ЛЬНЯ** *ж; уст.* йоҡо бүлмәһе (*гәҙәттә, батша һарайында, баярҙар йортонда*)

**ОПОШЛЕ́НИЕ** *с см.* **опо́шлить, опо́шлиться**

**ОПО́ШЛИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*сделать пошлым*) ҡара яғыу, әшәке итеп күрһәтеү **2.** *что* (*сделать избитым, затасканным*) ҡәҙерһеҙләү, ҡәҙерен китәреү (ебәреү)

**ОПО́ШЛИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать пошлым*) әшәкеләнеү, әшәке булыу **2.** (*стать избитым*) ҡәҙерһеҙләнеү, ҡәҙере китеү

**ОПОШЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **опо́шлить**

**ОПОШЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опо́шлиться 2.** *страд. от* **опошля́ть**

**ОПОЭТИЗИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* шиғрилаштырыу, биҙәп күрһәтеү

**ОПОЯ́САТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* билбау бәйләү, билен бәйләү, билгә бәйләү **2.** *что; перен.* (*окружить собой*) әйләндереп (солғап, уратып) алыу; **река́ опоя́сала дере́вню** ауылды йылға уратып алған

**ОПОЯ́САТЬСЯ** *сов.* **1.** (*подпоясаться*) билде быуыу, билбау бәйләү **2.** *перен.* (*стать окружённым чем-л.*) әйләндереп (уратылып) алыныу

**ОПОЯ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **опоя́сать**

**ОПОЯ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опоя́саться 2.** *страд. от* **опоя́сывать**

**ОППОЗИЦИОНЕ́Р** *м* оппозиционер (*оппозиция яҡлы кеше*)

**ОППОЗИЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое оппозиция ...ы; **оппозицио́нный блок** оппозиция блогы

**ОППОЗИ́ЦИЯ** *ж* оппозиция (**1.** *ҡаршы тороу, килешмәү* **2.** *берәй йәмғиәт, ойошма һ.б. эсендә күпселектең ҡарашына, сәйәсәтенә үҙенең сәйәсәтен һ.б. ҡаршы ҡуйған төркөм*); **парла́ментская оппози́ция** парламент оппозицияһы

**ОППОНЕ́НТ** *м* оппонент; **официа́льный оппоне́нт** рәсми оппонент

**ОППОНИ́РОВАТЬ** *несов.* оппонент булыу, ҡаршы фекер әйтеү (*берәр диспутта, ғилми бәхәстә һ.б.*)

**ОППОРТУНИ́ЗМ** *м; ист.* оппортунизм (*эшселәр хәрәкәтендә марксизм-ленинизмға ҡаршы булған ағым*)

**ОППОРТУНИ́СТ** *м* оппортунист, оппортунизм яҡлы

**ОППОРТУНИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое оппортунистик; **оппортунисти́ческая тео́рия** оппортунистик теория

**ОППОРТУНИ́СТСКИЙ,** -ая, -ое оппортунист; **оппортуни́стская гру́ппа** оппортунистар төркөмө

**ОПРА́ВА** *ж* тирәс; **опра́ва для очко́в** күҙлек тирәсе

**ОПРАВДА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **оправда́ть 2.** (*приговор суда*) аҡлау, ғәйепһеҙ тип табыу **3.** (*довод*) һылтау, сәбәп, дәлил; **найти́ оправда́ние** аҡланыу өсөн дәлил табыу

**ОПРАВДА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое аҡлау ...ы; **оправда́тельный пригово́р** аҡлау хөкөмө; **оправда́тельный докуме́нт** аҡлау документы

**ОПРАВДА́ТЬ** *сов. кого-что; в разн. знач.* аҡлау; **оправда́ть дове́рие** ышанысты аҡлау; **оправда́ть расхо́ды** сығымдарҙы аҡлау; **оправда́ть расхо́ды счета́ми и распи́сками** *бухг.* сығымдарҙы счёттар һәм распискалар менән аҡлау

**ОПРАВДА́ТЬСЯ** *сов.; в разн. знач.* аҡланыу; **предсказа́ния оправда́лись** әйткәндәр аҡланды; **затра́ты оправда́лись** тотолған аҡсалар аҡланды

**ОПРА́ВДЫВАТЬ** *несов. см.* **оправда́ть**

**ОПРА́ВДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оправда́ться 2.** *страд. от* **опра́вдывать**

**ОПРА́ВИТЬ I** *сов. что* төҙәтеү, ипләү, рәтләү, ипләп (рәтләп, төҙәтеп) ҡуйыу; **опра́вить посте́ль** түшәкте төҙәтеп ҡуйыу; **опра́вить пла́тье** күлдәкте рәтләү

**ОПРА́ВИТЬ II** *сов. что* тирәсләү, тирәс ҡуйыу; **опра́вить драгоце́нный ка́мень** аҫыл ташҡа тирәс ҡуйыу

**ОПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* **1.** төҙәтенеү, яһаныу; **опра́виться пе́ред зе́ркалом** көҙгө алдында төҙәтенеү **2.** *от чего* яҙылыу, арыуланыу,

һауығыу, төҙәлеү; **опра́виться от боле́зни** ауырыуҙан төҙәлеү **3.** иҫкә килеү, иҫ йыйыу, үҙ-үҙеңде ҡулға алыу; **опра́виться от смуще́ния** ҡаушауҙан иҫкә килеү **4.** рәтләнеү, аяҡҡа баҫыу; **опра́виться от после́дствий пожа́ра** янғын эҙемтәләренән рәтләнеү **5.** *разг.* (*отправить естественную надобность*) тышҡа сығыу, ярау итеү, бушаныу

**ОПРАВЛЯ́ТЬ I** *несов. см.* **опра́вить** I

**ОПРАВЛЯ́ТЬ II** *несов. см.* **опра́вить** II

**ОПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опра́виться** **2.** *страд. от* **оправля́ть** I

**ОПРА́ШИВАТЬ** *несов. см.* **опроси́ть**

**ОПРЕДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **определи́ть**, **определи́ться** **2.** билдәләмә; **нау́чное определе́ние** ғилми билдәләмә **3.** *юр.* ҡарар; **определе́ние суда́** суд ҡарары **4.** *грам.* аныҡлаусы

**ОПРЕДЕЛЁННОСТЬ** *ж* асыҡлыҡ, аныҡлыҡ, билдәлелек

**ОПРЕДЕЛЁННЫЙ**, -ая, -ое **1.** *прич. от* **определи́ть** **2.** *прил.* билдәле, билдәләнгән; **встре́титься в определённый час** билдәләнгән сәғәттә осрашыу **3.** *прил.* аныҡ, асыҡ, аңлайышлы; **дать определённый отве́т** аныҡ яуап биреү **4.** *прил.* билдәле, билдәле бер, ҡайһы бер; **при определённых усло́виях** билдәле бер шарттарҙа

**ОПРЕДЕЛИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** (*книга для справок*) белешмә; **определи́тель расте́ний** үҫемлектәр белешмәһе **2.** *мат.* билдәләүсе

**ОПРЕДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ**, -ая, -ое **1.** билдәләүсе ...ы; **определи́тельные табли́цы семе́йств расте́ний** үҫемлектәр ғаиләһен билдәләүсе таблицалар **2.** *грам.* аныҡлаусы; **определи́тельное предложе́ние** аныҡлаусы һөйләм

**ОПРЕДЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *в разн. знач.* билдәләү; **определи́ть во́зраст** *чей-л.* *кемдеңдер* йәшен билдәләү; **определи́ть направле́ние ве́тра** елдең йүнәлешен билдәләү; **определи́ть пло́щадь кру́га** түңәрәктең майҙанын билдәләү; **определи́ть хара́ктер геро́я** геройҙың характерын билдәләү; **определи́ть час заня́тий** дәрестәр сәғәтен билдәләү; **обрабо́тка по́чвы определя́ет урожа́й** ерҙе эшкәртеү уңышты билдәләй

**ОПРЕДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать ясным*) билдәләнеү, билдәле булыу, асыҡланыу; **боле́знь определи́лась** ауырыу асыҡланды **2.** *спец.* урыныңды (ҡайҙа икәнлегеңде) билдәләү; **определи́ться по ко́мпасу** компас буйынса ҡайҙа икәнлегеңде билдәләү

**ОПРЕДЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **определи́ть**

**ОПРЕДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **определи́ться** **2.** *страд. от* **определя́ть**

**ОПРЕСНЕ́НИЕ** *с см.* **опресни́ть** — **опресня́ть**

**ОПРЕСНИ́ТЕЛЬ** *м* сөсөләндергес

**ОПРЕСНИ́ТЕЛЬНЫЙ**, -ая, -ое сөсөләндерә торған; **опресни́тельный аппара́т** (һыуҙы) сөсөләндерә торған аппарат

**ОПРЕСНИ́ТЬ** *сов. что* сөсөләндереү, сөсөртөү; **опресни́ть морску́ю во́ду** диңгеҙ һыуын сөсөләндереү

**ОПРЕСНЯ́ТЬ** *несов. см.* **опресни́ть**

**ОПРИХО́ДОВАТЬ** *сов. что* керемгә яҙып ҡуйыу

**ОПРИ́ЧНИК** *м*; *ист.* опричник (*опричнинала тороусы*)

**ОПРИ́ЧНИНА** *ж*; *ист.* опричнина (**1.** *Иван Грозныйҙың баяр-кенәздәр оппозицияһын тар-мар итеү, үҙәкләштерелгән дәүләтте нығытыу өсөн үткәргән гәҙәттән тыш саралар системаһы* **2.** *шул замандағы махсус ғәскәр* **3.** *Иван Грозный тарафынан эре баярҙарҙан тартып алынған һәм батша биләмәләренә ингән ерҙәр*)

**ОПРО́БОВАНИЕ** *с см.* **опро́бовать**

**ОПРО́БОВАТЬ** *сов. что* **1.** һынау, һынап ҡарау; **опро́бовать но́вую маши́ну** яңы машинаны һынап ҡарау **2.** анализ яһау, сифатын билдәләү; **опро́бовать руду́** мәғдәндең сифатын билдәләү

**ОПРОВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **опрове́ргнуть**

**ОПРОВЕ́РГНУТЬ** *сов. что* кире ҡағыу, юҡҡа сығарыу; **опрове́ргнуть до́воды** дәлилдәрҙе юҡҡа сығарыу; **опрове́ргнуть ло́жное сообще́ние** ялған хәбәрҙе кире ҡағыу

**ОПРОВЕРЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **опроверга́ть** — **опрове́ргнуть** **2.** (*сообщение, статья, в которых что-л. опровергается*) кире ҡағыу; **напеча́тать официа́льное опроверже́ние** рәсми кире ҡағыуҙы баҫыу

**ОПРОКИДНО́Й**, -ая, -ое ауҙармалы; **опрокидно́й ку́зов** ауҙармалы кузов

**ОПРОКИ́ДЫВАТЕЛЬ** *м*; *тех.* ауҙарғыс (*механизм*)

**ОПРОКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **опроки́нуть**

**ОПРОКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опроки́нуться** **2.** *страд. от* **опроки́дывать**

**ОПРОКИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *что* ауҙарыу; **опроки́нуть стол** өҫтәлде ауҙарыу; **опроки́нуть ка́шу на сковоро́дку** бутҡаны табаға ауҙарыу **2.** *кого-что*; *разг.* (*вывалить из экипажа, лодки и т.п.*) ҡолатыу; **опроки́нуть седока́** һыбайлыны ҡолатыу **3.** *кого-что*; *перен.* (*сбить с позиций*) сигендереү, ҡыуып ебәреү; **опроки́нуть войска́ проти́вника** дошман ғәскәрен ҡыуып ебәреү **4.** *что*; *перен.* (*ниспровергнуть*) емереү, юҡҡа сығарыу; **опроки́нуть устаре́вшие техни́ческие но́рмы** иҫкергән техник нормаларҙы юҡҡа сығарыу

**ОПРОКИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** ауыу, түңкәрелеү, ҡапланыу; **теле́га опроки́нулась** арба ауҙы **2.** салҡан йығылыу (ауыу); **медве́дь опроки́нулся** айыу салҡан ауҙы **3.** *на кого*; *перен.* (*обрушиться на противника*) ташланыу, һөжүм итеү; **опроки́нуться на врага́** дошманға ташланыу

**ОПРОМЕ́ТЧИВОСТЬ** *ж* дыуамаллыҡ, алабарманлыҡ, уйламай эшләү

**ОПРОМЕ́ТЧИВЫЙ,** -ая, -ое дыуамал, алабарман, уйламай эшләнгән; **опроме́тчивый па́рень** дыуамал егет; **опроме́тчивый посту́пок** уйламай эшләнгән эш

**О́ПРОМЕТЬЮ** *нареч.* ашығып, атылып, бик тиҙ (шәп); **о́прометью бежа́ть** бик шәп йүгереү

**ОПРО́С** *м см.* **опроси́ть — опра́шивать**; **опро́с свиде́телей** шаһиттарҙан һорашып сығыу (һорау алыу)

**ОПРОСИ́ТЬ** *сов. кого-что* һорашыу, һорау алыу, һорашып (һорап) сығыу, һорау; **опроси́ть населе́ние** халыҡтан һорашып сығыу; **опроси́ть уча́щихся** уҡыусыларҙан дәрес һорау

**ОПРО́СНЫЙ,** -ая, -ое һорашыу ...ы, һорау алыу, һорашып сығыу; **опро́сный лист** һорау алыу ҡағыҙы

**ОПРОСТОВОЛО́СИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* яңылышыу, яңылышлыҡ эшләү, абайһыҙҙан яңылышыу

**ОПРОТЕСТОВА́ТЬ** *сов. что* протест белдереү (яһау); **опротестова́ть пригово́р суда́** суд ҡарарына протест яһау

**ОПРОТЕСТО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **опротестова́ть**

**ОПРОТИ́ВЕТЬ** *сов.* биҙҙереү, туйҙырыу, биҙҙереп (туйҙырып) бөтөрөү

**ОПРЫ́СКАТЬ** *сов. кого-что* һиптереү, бөркөү, һиптереп (бөркөп) сығыу; **опры́скать во́лосы духа́ми** сәскә хушбуй бөркөү

**ОПРЫ́СКАТЬСЯ** *сов.* өҫкә бөркөү (һибеү); **опры́скаться духа́ми** өҫкә хушбуй бөркөү

**ОПРЫ́СКИВАНИЕ** *с см.* **опры́скивать, опры́скиваться**

**ОПРЫ́СКИВАТЕЛЬ** *м* һиптергес, бөркөүес

**ОПРЫ́СКИВАТЬ** *несов. см.* **опры́скать**

**ОПРЫ́СКИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опры́скаться 2.** *страд. от* **опры́скивать**

**ОПРЯ́ТНОСТЬ** *ж* бөхтәлек, йыйнаҡлыҡ; **опря́тность оде́жды** кейемдең бөхтәлеге

**ОПРЯ́ТНЫЙ,** -ая, -ое бөхтә, йыйнаҡ; **опря́тный вид** бөхтә ҡиәфәт

**ОПТА́НТ** *м*; *юр.* оптант (*оптацияға хоҡуғы бар кеше*)

**ОПТА́ЦИЯ** *ж*; *юр.* оптация (*бер дәүләттән икенсе дәүләткә күскән ерҙә йәшәгән халыҡтың гражданлыҡ һайлау хоҡуғы*)

**О́ПТИК** *м* оптик, оптика белгесе

**О́ПТИКА** *ж* оптика (**1.** *физиканың яҡтылыҡты өйрәнеү бүлеге* **2.** *оптик приборҙар һәм инструменттар*)

**ОПТИМА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое оптималь, иң ҡулай(лы), иң яҡшы; **оптима́льные сро́ки се́ва** сәсеүҙең иң ҡулайлы ваҡыты

**ОПТИМИ́ЗМ** *м* оптимизм (*киләсәккә ышаныс һәм өмөт менән ҡарау*)

**ОПТИМИ́СТ** *м* и **ОПТИМИ́СТКА** *ж* оптимист

**ОПТИМИСТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое оптимистик; **оптимисти́ческий взгляд на бу́дущее** киләсәккә оптимистик ҡараш

**ОПТИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое **1.** оптик; **опти́ческий прибо́р** оптик ҡорамал; **опти́ческий обма́н** оптик яңылышлыҡ **2.** оптика ...ы; **опти́ческий магази́н** оптика магазины

**ОПТОВИ́К** *м* эре сауҙагәр, күмәртәләп сауҙа итеүсе

**ОПТО́ВЫЙ,** -ая, -ое күмәртә; **опто́вая торго́вля** күмәртә сауҙа

**О́ПТОМ** *нареч.* **1.** күмәртәләп, күпләп; **торго́вля о́птом** күмәртәләп һатыу итеү **2.** *перен.*, *разг.* (*всё сразу*) бер юлы, тотош

**ОПУБЛИКОВА́НИЕ** *с см.* **опубликова́ть**

**ОПУБЛИКОВА́ТЬ** *сов. что* баҫтырыу, баҫтырып сығарыу; **опубликова́ть статью́** мәҡәлә баҫтырыу

**ОПУБЛИКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **опубликова́ть**

**О́ПУС** *м* **1.** *муз.* опус **2.** *разг.*, *шутл.* (*сочинение, труд*) яҙма, әҫәр

**ОПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **опусти́ть**

**ОПУСКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опусти́ться 2.** *страд. от* **опуска́ть**

**ОПУСКНО́Й,** -ая, -ое төшөрмәле; **опускны́е о́кна** төшөрмәле тәҙрәләр

**ОПУСТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое буш, бушап ҡалған, ташландыҡ; **опусте́лые у́лицы** бушап ҡалған урамдар; **опусте́лый дом** ташландыҡ өй

**ОПУСТЕ́ТЬ** *сов.* бушау, бушап ҡалыу; **у́лицы совсе́м опусте́ли** урамдар бөтөнләй бушап ҡалды

**ОПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* төшөрөү, төшөрөп ҡуйыу; **опусти́ть за́навес** пәрҙәне төшөрөү; **опусти́ть ребёнка с рук на́ пол** баланы ҡулдан иҙәнгә төшөрөү **2.** *что* (*наклонить*) эйеү, түбән (аҫҡа) эйеү; **опусти́ть го́лову** башты эйеү **3.** *что* аҫҡа (түбән) ҡарау, аҫҡа (түбән) төшөрөү; **опусти́ть глаза́** күҙҙәрҙе түбән төшөрөү **4.** *что, во что* төшөрөү, тығыу; **опусти́ть ру́ку в карма́н** ҡулды кеҫәгә тығыу; **опусти́ть письмо́ в я́щик** хатты йәшниккә төшөрөү **5.** *что* (*пропустить*) төшөрөү, төшөрөп ҡалдырыу; **опусти́ть сло́во при чте́нии** уҡығанда һүҙҙе төшөрөп ҡалдырыу **6.** *что* (*ослабить, отпустить*) бушатыу, бушата төшөү; **опусти́ть подпру́гу** айылды бушатыу

**ОПУСТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** төшөү; **опусти́ться на дно мо́ря** диңгеҙ төбөнә төшөү; **самолёт опусти́лся на зе́млю** самолёт ергә төштө; **што́ра опусти́лась** тәҙрә пәрҙәһе төштө **2.** (*наклониться*) эйелеү, түбән эйелеү **3.** ултырыу; **опусти́ться на дива́н** диванға ултырыу **4.** *перен.* (*стать неопрятным*) һәпрәгә әйләнеү, үҙен-үҙе ҡарамау, түбәнселеккә төшөү

**ОПУСТОША́ТЬ** *несов. см.* **опустоши́ть**

**ОПУСТОШЕ́НИЕ** *с см.* **опустоши́ть — опустоша́ть**

**ОПУСТОШЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **опустоши́ть 2.** *прил.* рухы төшкән, өмөтһеҙ, рухһыҙ; **опустошённый челове́к** рухһыҙ кеше

**ОПУСТОШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һәләкәтле, бөлдөргөс, емергес; **опустоши́тельные во́йны** һәләкәтле һуғыштар

**ОПУСТОШИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* буш ҡалдырыу, һәләк (харап) итеү, бөлдөрөү, бөлгөнлөккә төшөрөү; **за́суха опустоши́ла поля́** ҡоролоҡ яландарҙы һәләк итте **2.** *что*; *разг., перен.* бушатыу; **опустоши́ть карма́н** кеҫәне бушатыу **3.** *кого-что*; *перен.* рухын һүндереү (төшөрөү), өмөтөн һүндереү

**ОПУ́ТАТЬ** *сов. кого-что* **1.** сырмау, урау, урап (сырмап) ҡуйыу; **опу́тать про́волокой** тимер сыбыҡ менән урап ҡуйыу **2.** *перен.* солғау, уратып (әйләндереп) алыу, баш әйләндереү; **опу́тать ло́жью** ялған менән башты әйләндереү **3.** *перен., разг.* юлдан яҙҙырыу

**ОПУ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **опу́тать**

**ОПУХА́ТЬ** *несов. см.* **опу́хнуть**

**ОПУ́ХНУТЬ** *сов.* шешеү, шешенеү; **лицо́ опу́хло от слёз** күҙ йәштәренән бит шешенде

**О́ПУХОЛЬ** *ж* шеш; **злока́чественная о́пухоль** яман шеш

**ОПУША́ТЬ** *несов. см.* **опуши́ть**

**ОПУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** йөн менән ҡаплау; **ла́пы за́йца гу́сто опушены́** ҡуяндың тәпәйҙәре ҡалын йөн менән ҡапланған **2.** (*о снеге, инее и т.п.*) ҡар (бәҫ) ҡаплау; **ине́й опуши́л дере́вья** ағастарҙы бәҫ ҡаплаған **3.** (*обшить по краям мехом*) ҡырпыулау, ҡырпыулап сығыу; **опуши́ть ша́пку но́ркой** бүректе шәшке тиреһе менән ҡырпыулау

**ОПУШИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** йөнләнеү, йөн үҫеү (сығыу); **птене́ц опуши́лся** ҡош балаһына йөн үҫкән **2.** (*покрыться снегом, инеем и т.п.*) ҡар (бәҫ) менән ҡапланыу, бәҫләнеү; **дере́вья опуши́лись сне́гом** ағастар ҡар менән ҡапланған

**ОПУ́ШКА I** *ж* **1.** *см.* **опуши́ть** 3; **2.** (*меховая обшивка по краю одежды*) ҡырпыу

**ОПУ́ШКА II** *ж* (*край леса*) урман ауыҙы (ситe), урман буйы

**ОПУЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **опусти́ть** 5 — **опуска́ть** 5; **2.** *мед.* төшөү, түбәнләү; **опуще́ние желу́дка** эс (ашҡаҙан) төшөү

**ОПЫЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *бот.* һеркәләнеү, һеркәләндереү; **иску́сственное опыле́ние** яһалма һеркәләндереү **2.** *см.* **опыли́ть** — **опыля́ть**

**ОПЫ́ЛИВАТЕЛЬ** *м* (*аппарат, машина*) һиптергес, бөрккөс

**ОПЫ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **опыли́ть** 2

**ОПЫЛИ́ТЕЛЬ** *м* **1.** һеркәләндереүсе (*ел, һыу, бөжәктәр, ҡоштар*) **2.** *см.* **опы́ливатель**

**ОПЫЛИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *бот.* (*произвести опыление*) һеркәләндереү **2.** (*покрыть растения особым составом*) һибеү, һиптереү

**ОПЫЛИ́ТЬСЯ** *сов.*; *бот.* һеркәләнеү, һеркәгә ултырыу; **цвето́к опыли́лся** сәскә һеркәләнде

**ОПЫЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **опыли́ть**

**ОПЫЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **опыли́ться 2.** *страд. от* **опыля́ть**

**О́ПЫТ** *м*; *в разн. знач.* тәжрибә; **обме́н о́пытом** тәжрибә (менән) уртаҡлашыу; **провести́ о́пыт** тәжрибә үткәреү

**О́ПЫТНИК** *м* тәжрибәсе

**О́ПЫТНОСТЬ** *ж* тәжрибәлелек

**О́ПЫТНЫЙ,** -ая, -ое **1.** тәжрибәле; **о́пытный учи́тель** тәжрибәле уҡытыусы **2.** тәжрибә ...ы; **о́пытная сельскохозя́йственная ста́нция** ауыл хужалығы тәжрибә станцияһы **3.** һынау ...ы; **о́пытный полёт** һынау осошо

**ОПЬЯНЕ́НИЕ** *с*; *прям., перен.* иҫереү; **пить до опьяне́ния** иҫергәнсе эсеү; **опьяне́ние от ра́дости** шатлыҡтан иҫереү

**ОПЬЯНЕ́ТЬ** *сов.*; *прям., перен.* иҫереү; **опьяне́ть от му́зыки** музыканан иҫереү

**ОПЬЯНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям., перен.* иҫертеү

**ОПЬЯНЯ́ТЬ** *несов. см.* **опьяни́ть**

**ОПЯ́ТЬ** *нареч.* тағы, йәнә

**ОПЯ́ТЬ-ТАКИ** *нареч. см.* **опя́ть**

**ОРА́КУЛ** *м* оракул (**1.** *боронғо заманда алла исеменән киләсәк тураһында төрлө хәбәр биреүсе жрец* **2.** *кҫм., кит. әйткән һүҙе ҡаршылыҡһыҙ хаҡ, дөрөҫ тип табылған кеше*)

**ОРАНГУТА́Н** и **ОРАНГУТА́НГ** *м* орангутанг (*кешегә оҡшаш эре маймыл*)

**ОРА́НЖЕВЫЙ,** -ая, -ое ҡыҙғылт һары, эфлисун төҫлө, хәнәүәт

**ОРАНЖЕРЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое оранжерея ...ы; **оранжере́йная температу́ра** оранжерея температураһы; **оранжере́йные цветы́** оранжерея сәскәләре ♦ **оранжере́йное расте́ние** *ирон.* наҙлы кеше

**ОРАНЖЕРЕ́Я** *ж* оранжерея

**ОРА́ТОР** *м* оратор, телмәр тотоусы

**ОРАТО́РИЯ** *ж* оратория (*хор, йырсы солист һәм оркестр өсөн яҙылған ҙур музыкаль әҫәр*)

**ОРА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое ораторлыҡ ...ы; **ора́торское иску́сство** ораторлыҡ оҫталығы

**ОРА́ТОРСТВОВАТЬ** *несов.*; *разг., ирон.* ораторлыҡ итеү, ораторҙарса ҡыланыу

**ОРА́ТЬ** *несов.*; *разг.* ҡысҡырыу, аҡырыу; **ора́ть от бо́ли** ауыртыуҙан аҡырыу; **ора́ть на весь дом** бөтә йорт ишетерлек итеп ҡысҡырыу; **нельзя́ ора́ть на люде́й** кешегә аҡырырға ярамай

**ОРБИ́ТА** *ж* **1.** *астр.* орбита; **орби́та Ма́рса** Марс орбитаһы **2.** *чего, какая*; *перен., книжн.* даирә; **втяну́ть в орби́ту своего́ влия́ния** үҙенең йоғонто даирәһенә йәлеп итеү **3.** (*глазница*) күҙ соҡоро

**ОРБИТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое орбиталь; **орбита́льная нау́чная ста́нция** орбиталь фәнни станция

**ОРГ...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "ойоштороу" мәғәнәһен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **оргбюро́** ойоштороу бюроһы; **оргвопро́с** ойоштороу мәсьәләһе

**О́РГАН** *м* **1.** ағза, орган; **о́рганы слу́ха** ишетеү ағзалары **2.** *чего; перен.* (*орудие, средство*) ҡорал, сара, орган; **печа́ть — о́рган воспита́ния молодёжи** матбуғат — йәштәрҙе тәрбиәләү сараһы **3.** *чего, какой* (*учреждение, организация*) орган; **о́рганы здравоохране́ния** һаулыҡ һаҡлау органдары **4.** (*периодическое печатное издание*) орган; **полити́ческий о́рган социа́л-демокра́тов** социал-демократтарҙың сәйәси органы

**ОРГА́Н** *м; муз.* орган

**ОРГАНИЗА́ТОР** *м* ойоштороусы

**ОРГАНИЗА́ТОРСКИЙ,** -ая, -ое ойоштороу ...ы, ойоштора алыу ...ы; **организа́торский тала́нт** ойоштороу таланты

**ОРГАНИЗАЦИО́ННЫЙ,** -ая, -ое ойоштороу ...ы; **организацио́нные вопро́сы** ойоштороу мәсьәләләре

**ОРГАНИЗА́ЦИЯ** *ж* **1.** *см.* **организова́ть, организова́ться**; **организа́ция кружка́** түңәрәк ойоштороу **2.** (*организованность*) ойошҡанлыҡ; **чёткость организа́ции труда́** хеҙмәттәге ойошҡанлыҡтың аныҡлығы **3.** *чего, какая* ойошма; **профсою́зная организа́ция** профсоюз ойошмаһы

**ОРГАНИ́ЗМ** *м* **1.** (*живое целое*) организм, тереклек эйәһе; **просте́йшие органи́змы** ябай организмдар **2.** (*совокупность свойств человека*) организм; **кре́пкий органи́зм** ныҡ организм **3.** (*сложное единство*) организм

**ОРГАНИЗО́ВАННОСТЬ** *ж* ойошҡанлыҡ, ойошторолғанлыҡ, тәртиплелек; **организо́ванность выступле́ний** сығыштың ойошҡанлығы

**ОРГАНИЗО́ВАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **организова́ть 2.** *прил.* (*упорядоченный*) ойошҡан, берҙәм; **организо́ванная борьба́** берҙәм көрәш **3.** *прил.* (*сплочённый*) ойошторолған, ойошҡан; **организо́ванный пролетариа́т** ойошҡан пролетариат **4.** *прил.* (*дисциплинированный*) йыйнаҡ, тәртипле; **организо́ванный челове́к** йыйнаҡ кеше

**ОРГАНИЗОВА́ТЬ** *сов., несов.* **1.** *что* ойоштороу; **организова́ть спорти́вное о́бщество** спорт йәмғиәте ойоштороу; **организова́ть соревнова́ние** ярыш ойоштороу **2.** *кого-что* (*объединить, сплотить*) туплау, берләштереү, ойоштороу; **организова́ть наро́д на борьбу́** халыҡты көрәшкә туплау **3.** *что* (*упорядочить*) дөрөҫ ойоштороу, тәртипкә һалыу; **организова́ть своё вре́мя** үҙ ваҡытыңды дөрөҫ ойоштороу

**ОРГАНИЗОВА́ТЬСЯ 1.** *сов., несов.* (*возникнуть, создаться*) ойошоу, ойошторолоу, барлыҡҡа килеү; **организова́лось министе́рство** министрлыҡ ойошторолдо **2.** *сов., несов.* (*объединиться*) ойошоу, берләшеү; **организова́ться в отря́д** отрядҡа ойошоу **3.** *несов. страд. от* **организова́ть**

**ОРГАНИЗО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **организова́ть**

**ОРГАНИЗО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **организова́ться 2.** *страд. от* **организо́вывать**

**ОРГАНИ́СТ** *м* органсы, органда уйнаусы

**ОРГАНИ́ЧЕСКИЙ I,** -ая, -ое органик, йәнле, тере; **органи́ческая приро́да** йәнле тәбиғәт; **органи́ческие удобре́ния** органик ашламалар ♦ **органи́ческая хи́мия** органик химия

**ОРГАНИ́ЧЕСКИЙ II,** -ая, -ое **1.** *мед.* орган ...ы, ағза ...ы, органға ҡараған, органик; **органи́ческий поро́к се́рдца** органик йөрәк ауырыуы **2.** *перен.* (*внутренне присущий кому-л.*) эске, тәбиғи, органик; **органи́ческий недоста́ток** тәбиғи кәмселек

**ОРГАНИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое тәбиғи, тәбиғәтенә хас булған; **органи́чная потре́бность** тәбиғи ихтыяж

**ОРГА́ННЫЙ,** -ая, -ое орган ...ы; **орга́нная му́зыка** орган музыкаһы

**О́РГИЯ** *ж* оргия (**1.** *тар. боронғо гректарҙа шарап һәм күңел асыу аллаһы Дионис хөрмәтенә үткәрелгән байрам* **2.** *күсм. типтереүле эске мәжлес*)

**ОРДА́** *ж* **1.** Урҙа (*боронғо төрки халыҡтарҙа дәүләт берләшмәһе*); **Золота́я Орда́** Алтын Урҙа **2.** *перен.* (*беспорядочная толпа*) өйөр, көтөү **3.** (*вражеское войско*) ҡоторонған дошман ғәскәре, илбаҫарҙар өйөрө; **фаши́стские орды́** фашист илбаҫарҙары өйөрө

**О́РДЕН** *м* **1.** (*мн.* **ордена́**) орден; **о́рден Оте́чественной войны́** Ватан һуғышы ордены **2.** (*мн.* **о́рдены**) орден; **о́рден иезуи́тов** иезуиттар ордены

**ОРДЕНОНО́СЕЦ** *м* орденлы, орден алған (*кеше йәки ойошма*)

**ОРДЕНОНО́СНЫЙ,** -ая, -ое орденлы; **орденоно́сный заво́д** орденлы завод

**О́РДЕНСКИЙ,** -ая, -ое орден ...ы; **о́рденская ле́нта** орден таҫмаһы

**О́РДЕР** *м* **1.** (*мн.* **ордера́**) ордер; **о́рдер на кварти́ру** фатир алыуға ордер **2.** (*мн.* **о́рдеры** и **ордера́**) *архит.* ордер (*архитектура композицияһының бер төрө*)

**ОРДИНА́РЕЦ** *м; воен.* ординарец, ординарсы

**ОРДИНА́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *книжн.* (*обыкновенный*) ғәҙәти; **ордина́рный слу́чай** ғәҙәти ваҡиға **2.** *уст.* (*штатный*) штаттағы, штатта торған; **ордина́рный профе́ссор** штаттағы профессор

**ОРДИНА́ТОР** *м* ординатор (*дауалаусы врач*)

**ОРДИНАТУ́РА** *ж* **1.** ординатура (*гәмәли медицина аспирантураһының бер төрө*) **2.** ординатор вазифаһы

**ОРЁЛ** *м* **1.** бөркөт, ҡарағош; **орёл-крику́н** баҡраҡ бөркөт; **орёл-моги́льник** таҙғара **2.** *перен.* бөркөт, баһадир, ҡыйыу ♦ **двугла́вый орёл** сәмреғош

**ОРЕО́Л** *м* **1.** (*светлый круг вокруг светящейся точки*) ореол, яҡтылыҡ ҡаймаһы **2.** *чего, какой*; *перен.* дан, хөрмәт, солғаныш; **орео́л таи́нственности** серлелек солғанышы **3.** *фото.* яҡтылыҡ

**ОРЕ́Х** *м* **1.** сәтләүек; **кедро́вые оре́хи** эрбет сәтләүеге **2.** (*древесина орехового дерева*) сәтләүек ағасы ♦ **доста́лось на оре́хи** *кому* эләкте, кәрәген бирҙеләр; **разде́лать под оре́х** *кого* тетмәһен тетеү, пыр туҙҙырыу

**ОРЕ́ХОВКА** *ж* (*птица*) кедр (эрбет) турғайы

**ОРЕ́ХОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** сәтләүек ...ы, сәтләүекле; **оре́ховое де́рево** сәтләүек ағасы; **оре́ховый торт** сәтләүекле торт **2.** сәтләүек ағасынан эшләнгән (яһалған); **оре́ховая ме́бель** сәтләүек ағасынан яһалған йорт йыһаҙы

**ОРЕ́ШЕК** *м*; *уменьш. от* **оре́х** 1 ♦ **твёрдый (тру́дный, кре́пкий) оре́шек**: 1) үҙ һүҙле кеше; 2) ауыр мәсьәлә

**ОРЕ́ШНИК** *м* сәтләүеклек

**ОРИГИНА́Л** *м* **1.** төп нөсхә, оригинал; **оригина́л статьи́** мәҡәләнең төп нөсхәһе **2.** *разг.* (*странный человек*) сәйер, үҙенсәлекле

**ОРИГИНА́ЛЬНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* башҡаларға оҡшамаҫҡа маташыу (тырышыу), үҙенсә ҡыланыу

**ОРИГИНА́ЛЬНОСТЬ** *ж* **1.** оригиналлек, күсереп алынмағанлыҡ **2.** үҙенсәлеклек **3.** үҙенә генә хаслыҡ, үҙенсә булғанлыҡ, башҡаларға оҡшамаған

**ОРИГИНА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*подлинный*) күсереп алынмаған, төп, оригиналь; **оригина́льные экземпля́ры** төп даналар **2.** (*самобытный*) үҙенсәлекле; **оригина́льный мысли́тель** үҙенсәлекле фекер йөрөтөүсе **3.** (*своеобразный*) үҙенә генә хас, үҙенсә, оригиналь, ғәҙәти булмаған

**ОРИЕНТАЛИ́ЗМ** *м* ориентализм (**1.** *Көнсығышты өйрәнеү, Көнсығыш һәм уның мәҙәниәте менән мауығыу* **2.** *Көнсығышҡа хас булыу*)

**ОРИЕНТАЛИ́СТ** *м* ориенталист, Көнсығыш белгесе

**ОРИЕНТАЛИ́СТИКА** *ж* ориенталистика (*Көнсығыштың тарихын, иҡтисадын, телен, сәнғәтен һ.б. өйрәнеү фәне*)

**ОРИЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое көнсығыш ...ы, ориенталь; **ориента́льный стиль** көнсығыш стиле

**ОРИЕНТА́ЦИЯ** *ж* **1.** (*определение местонахождения*) үҙең торған урынды билдәләү (юҫыҡлау) **2.** *перен.* (*умение разобраться в чём-л.*) таныш булыу, хәбәрҙар булыу, белеү **3.** *перен.* (*направленность деятельности*) йүнәлеш алыу, иҫәп тотоу

**ОРИЕНТИ́Р** *м* ориентир; **вы́брать ориенти́р** ориентир һайлау

**ОРИЕНТИ́РОВАНИЕ** *с см.* **ориенти́ровать** 1—3, **ориенти́роваться** 1—3; **ориенти́рование на ме́стности** торған урынды билдәләү

**ОРИЕНТИ́РОВАТЬ** *сов.*, *несов. кого-что* **1.** йүнәлдереү, йүнәлеш биреү, ориентирлау; **ориенти́ровать на ме́стности** урында йүнәлеш биреү **2.** *в чём*; *перен.* (*помочь разобраться*) төшөндөрөү, аңлатыу, йүнәлеш биреү; **ориенти́ровать в вопро́сах поли́тики** сәйәсәт мәсьәләләрен аңлатыу **3.** *на кого-что*; *перен.* (*поставить определённую цель*) йүнәлтеү, маҡсат ҡуйыу, күрһәтеү; **ориенти́ровать на испо́льзование ме́стных ресу́рсов** урындағы ресурстарҙы файҙаланыуға маҡсат ҡуйыу

**ОРИЕНТИ́РОВАТЬСЯ 1.** *сов.*, *несов.* йүнәлеш ала белеү, ориентирлашыу, ориентация алыу, юл таба алыу; **ориенти́роваться в го́роде** ҡалала юл таба алыу **2.** *сов.*, *несов. в чём*; *перен.* төшөнөү, төшөнөп алыу, аңлау; **ориенти́роваться в сло́жном материа́ле** ҡатмарлы материалды аңлау; **ориенти́роваться в но́вой обстано́вке** яңы шарттарҙы төшөнөп алыу **3.** *сов.*, *несов. на кого-что*; *перен.* йүнәлеш тотоу, йүнәлеш алыу, иҫәп тотоу, күҙҙә тотоу; **ориенти́роваться на чита́телей** уҡыусыларға иҫәп тотоу **4.** *несов. страд. от* **ориенти́ровать** 1, 3

**ОРИЕНТИРО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **ориенти́ровать** 1—3, **ориенти́роваться** 1—3; **спо́собы ориентиро́вки в лесу́** урманда юлды таба белеү саралары **2.** *перен.* айышына төшөнә алыу, аңлай белеү

**ОРИЕНТИРО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ориентир ...ы, йүнәлеш алыу ...ы; **ориентиро́вочный пункт** ориентир пункты **2.** (*предварительный, приблизительный*) яҡынса, сама менән; **ориентиро́вочные сро́ки** яҡынса сроктар

**ОРКЕ́СТР** *м* **1.** оркестр; **симфони́ческий орке́стр** симфоник оркестр; **духово́й орке́стр** тынлы оркестр **2.** (*место для музыкантов*) музыканттар урыны (*сәхнә алдында*)

**ОРКЕСТРА́НТ** *м* и **ОРКЕСТРА́НТКА** *ж* оркестрҙа уйнаусы

**ОРКЕСТРОВА́ТЬ** *сов.*, *несов. что*; *муз.* оркестрға һалыу, оркестрлау; **оркестрова́ть пе́сню** йырҙы оркестрға һалыу

**ОРКЕСТРО́ВКА** *ж см.* **оркестрова́ть**

**ОРКЕСТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** оркестр ...ы; **оркестро́вая па́ртия** оркестр партияһы **2.** оркестр өсөн яҙылған; **оркестро́вая му́зыка** оркестр өсөн яҙылған музыка

**ОРЛА́Н** *м* диңгеҙ бөркөтө

**ОРЛЁНОК** *м* бөркөт балаһы, бала бөркөт

**ОРЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое **1.** бөркөт ...ы; **орли́ное гнездо́** бөркөт ояһы **2.** *перен.* ҡыйыу, батыр, ғәйрәтле, үткер; **орли́ный взгля́д** ҡыйыу ҡараш ♦ **орли́ный нос** көмрө танау

**ОРЛИ́ЦА** *ж* инә бөркөт, инә ҡарағош

**ОРНА́МЕНТ** *м* орнамент, биҙәк

**ОРНАМЕНТА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *иск.* орнамент, орнаменталь, биҙәкле; **орнамен-**

**та́льные рабо́ты** орнаменталь эштәр **2.** *иск., лит.* орнаментлы, биҙәкле; **орнамента́льный стиль** орнаментлы стиль

**ОРНАМЕНТА́ЦИЯ** *ж; иск.* **1.** (*украшение орнаментом*) биҙәкләү, һырлау; **орнамента́ция сосу́дов** һауыттар биҙәкләү **2.** (*характер орнамента*) орнаментация, биҙәктәр системаһы

**ОРНАМЕНТИ́РОВАТЬ** *сов., несов. что* биҙәкләү, биҙәк төшөрөү, һырлау; **орнаменти́ровать горшки́** көршәктәргә биҙәк төшөрөү

**ОРНАМЕНТИРО́ВКА** *ж см.* **орнаменти́ровать**

**ОРНИТО́ЛОГ** *м* орнитолог, орнитология белгесе

**ОРНИТОЛОГИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое орнитологик, орнитология …ы; **орнитологи́ческие иссле́дования** орнитологик тикшеренеүҙәр

**ОРНИТОЛО́ГИЯ** *ж* орнитология (*зоологияның ҡоштарҙы өйрәнеү бүлеге*)

**ОРОБЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡурҡҡан, ҡаушаған, ҡаушап ҡалған, шөрләгән

**ОРОБЕ́ТЬ** *сов.* ҡурҡып (ҡаушап) китеү, ҡаушап ҡалыу, шөрләү

**ОРОГОВЕ́ТЬ** *сов.* ҡатыу, һөйәлләнеү (*тиренең тышҡы ҡаты тураһында*)

**ОРОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое орографик, орография …ы; **орографи́ческая ка́рта** орографик карта

**ОРОГРА́ФИЯ** *ж* орография (*физик географияның ер өҫтө рельефын өйрәнеү бүлеге*)

**ОРОСИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һуғарыу …ы; **ороси́тельный кана́л** һуғарыу каналы

**ОРОСИ́ТЬ** *сов. что* **1.** еүешләү, сылатыу, дымландырыу; **дождь ороси́л зе́млю** ямғыр ерҙе еүешләне **2.** һуғарыу; **ороси́ть пусты́ню** сүлде һуғарыу

**ОРОСИ́ТЬСЯ** *сов.* еүешләнеү, сыланыу, дымланыу, һуғарылыу

**ОРОША́ТЬ** *несов. см.* **ороси́ть**

**ОРОША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ороси́ться** **2.** *страд. от* **ороша́ть**

**ОРОШЕ́НИЕ** *с см.* **ороси́ть** — **ороша́ть**

**ОРТОДО́КС** *м; книжн.* ортодокс, ортодоксаль ҡараштағы кеше

**ОРТОДОКСА́ЛЬНОСТЬ** *ж; книжн.* ортодоксаллек

**ОРТОДОКСА́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *книжн.* ортодоксаль; **ортодокса́льные взгля́ды** ортодоксаль ҡараштар

**ОРТОДО́КСИЯ** *ж; книжн.* ортодоксия (*берәй нәмәгә ныҡ ышанғанлыҡ, берәй нәмәгә ортодоксаль бирелгәнлек*)

**ОРТОПЕ́Д** *м* ортопед, ортопедия белгесе

**ОРТОПЕДИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое ортопедия …ы, ортопедик; **ортопеди́ческая о́бувь** ортопедик аяҡ кейеме

**ОРТОПЕ́ДИЯ** *ж* ортопедия (*медицинала умыртҡа һөйәген, ҡул-аяҡ кәкрәйеүен өйрәнеү һәм дауалау бүлеге*)

**ОРУ́ДИЕ** *с* **1.** ҡорал, эш ҡоралы; **земледе́льческие ору́дия** ер эшкәртеү ҡоралдары; **ору́дия произво́дства** етештереү ҡоралдары **2.** *перен.* сара, ысул, юл; **язы́к — ору́дие обще́ния** тел — аралашыу сараһы **3.** *воен.* туп, орудие; **артиллери́йское ору́дие** артиллерия тубы

**ОРУДИ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое орудие(лар) …ы, туп …ы, орудиеларҙан, туптарҙан; **оруди́йный расчёт** орудие расчёты

**ОРУ́ДОВАТЬ** *несов.; разг.* **1.** *чем* эшләү, эш итеү, эш итә (ҡуллана) белеү; **ору́довать пило́й** бысҡы менән эш итеү **2.** (*распоряжаться, хозяйничать*) эш алып барыу, идара (хужалыҡ) итеү, хужа булыу

**ОРУЖЕ́ЙНИК** *м* ҡорал яһаусы оҫта

**ОРУЖЕ́ЙНЫЙ,** -ая, -ое ҡорал …ы; **оруже́йный заво́д** ҡорал заводы ♦ **Оруже́йная пала́та** Ҡорал палатаһы (*Мәскәү Кремлендәге музей*)

**ОРУЖЕНО́СЕЦ** *м; ист.* ҡорал йөрөтөүсе (*урта быуаттарҙа рыцарҙың ҡоралын йөрөтөүсе йәш яугир*)

**ОРУ́ЖИЕ** *с; прям., перен.* ҡорал, һуғыш ҡоралы; **холо́дное ору́жие** һалҡын ҡорал (*ҡылыс, хәнйәр, бысаҡ һ.б.*); **стрелко́вое ору́жие** атыу ҡоралы (*мылтыҡ, револьвер һ.б.*); **печа́ть — могу́чее ору́жие** матбуғат — көслө ҡорал

**ОРФОГРАФИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое орфография …ы, орфографик; **орфографи́ческий слова́рь** орфография һүҙлеге; **орфографи́ческая оши́бка** орфографик хата

**ОРФОГРА́ФИЯ** *ж* орфография, дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре

**ОРФОЭПИ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое орфоэпия …ы, орфоэпик; **орфоэпи́ческие но́рмы языка́** телдең орфоэпик нормалары

**ОРФОЭ́ПИЯ** *ж* орфоэпия (*дөрөҫ әйтеү ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү*)

**ОРХИДЕ́Я** *ж* орхидея (*тропик үҫемлек*)

**ОСА́** *ж* һағыҙаҡ

**ОСА́ДА** *ж* ҡамау, ҡамалыш, солғаныш; **оса́да го́рода** ҡаланы ҡамап алыу

**ОСАДИ́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* (*подвергнуть осаде*) ҡамау, солғау, ҡамап (солғап) алыу; **осади́ть кре́пость** ҡәлғәне ҡамап алыу **2.** *кого; перен., разг.* (*окружить, столпиться*) уратыу, йыйылыу, тупланыу **3.** *кого, чем; перен., разг.* (*обременить просьбами, вопросами и т.д.*) теңкәгә тейеү, йөҙәтеү, йөҙәтеп бөтөрөү; **осади́ть вопро́сами** һорауҙар менән йөҙәтеү

**ОСАДИ́ТЬ II** *сов. что* (*заставить выделиться из раствора*) тондороу, төбөнә ултыртыу; **осади́ть муть** буръякты тондороу

**ОСАДИ́ТЬ III** *сов.* **1.** *кого* и *без. доп.* (*заставить остановиться*) ҡапыл туҡтатыу, ҡапыл сиктереү; **кру́то осади́ть коня́** атты ҡапыл туҡтатыу **2.** *кого; перен.* (*одёрнуть*) ҡырҡа туҡтатыу, тыйыу, баҫылдырыу

**ОСА́ДКА** *ж* **1.** (*оседание сооружения, грунта*) ултырыу, баҫылыу, сүгеү; **оса́дка фунда́мента** нигеҙҙең ултырыуы **2.** *мор.* батым (*судноның һыуға батып тороу кимәле*)

**ОСА́ДОК** *м* **1.** ултырма, һарҡынды, төпрә; **оса́док в расти́тельном ма́сле** үҫемлек майының төпрәһе; **дать оса́док** ултырма биреү **2.** *перен.* күңелдәге төйөр, ауыр тәьҫир, ауыр тойғо; **оста́вить тяжёлый оса́док** ауыр тәьҫир ҡалдырыу **3.** *обычно мн.* **оса́дки**; *геол.* ултырма тоҡомдар **4.** *мн.* **оса́дки** яуын, яуым-төшөм

**ОСА́ДОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ултырма ...ы, һарҡынды, төпрә ...ы; **оса́дочный слой** төпрә ҡатламы **2.** *геол.* ултырма ...ы; **оса́дочные го́рные поро́ды** ултырма тау тоҡомдары **3.** һарҡытыу ...ы; **оса́дочный чан** һарҡытыу киҫмәге

**ОСАЖДА́ТЬ I** *несов. см.* **осади́ть** I

**ОСАЖДА́ТЬ II** *несов. см.* **осади́ть** II

**ОСАЖДА́ТЬСЯ I** *несов. страд. от* **осажда́ть** I

**ОСАЖДА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** (*выделяться из жидкости*) ултырыу, һарҡыу, тоноу **2.** (*об атмосферных осадках*) яуыу, төшөү **3.** *страд. от* **осажда́ть** II

**ОСАЖДЕ́НИЕ** *с см.* **осади́ть** II, **осажда́ться** II

**ОСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **осади́ть** III

**ОСА́НИСТОСТЬ** *ж* һынлылыҡ, килбәтлелек

**ОСА́НИСТЫЙ,** -ая, -ое килбәтле, һынлы

**ОСА́НКА** *ж* килеш-килбәт, килбәт, һын; **го́рдая оса́нка** ғорур һын

**ОСАТАНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ярһыған, ҡоторонған, енләнгән, шашҡан; **осатане́лый враг** ҡоторонған дошман

**ОСАТАНЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* ҡоторуоу, үтә ярһыу, енләнеү, шашыныу

**ОСВА́ИВАТЬ** *несов. см.* **осво́ить**

**ОСВА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **осво́иться** **2.** *страд. от* **осва́ивать**

**ОСВЕДОМИ́ТЕЛЬ** *м* белдереүсе, еткереп тороусы, хәбәр биреүсе (итеүсе), шымсы

**ОСВЕДОМИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое (*содержащий сообщение о чём-л.*) белдереү ...ы, таныштырыу ...ы; **осведоми́тельный докла́д** таныштырыу доклады

**ОСВЕ́ДОМИТЬ** *сов. кого-что* белдереү, хәбәр итеү, таныштырыу

**ОСВЕ́ДОМИТЬСЯ** *сов.* белешеү, һорашыу, һорашып белешеү; **осве́домиться о здоро́вье** сәләмәтлеге тураһында һорашып белешеү

**ОСВЕДОМЛЕ́НИЕ** *с см.* **осве́домить** — **осведомля́ть**, **осве́домиться** — **осведомля́ться**

**ОСВЕДОМЛЁННОСТЬ** *ж* хәбәрҙар булыу, хәбәрләшеп тороу

**ОСВЕДОМЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **осве́домить** **2.** *прил.* хәбәрҙар, таныш, белгән; **быть осведомлённым** хәбәрҙар булыу

**ОСВЕДОМЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **осве́домить**

**ОСВЕДОМЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **осве́домиться** **2.** *страд. от* **осведомля́ть**

**ОСВЕЖА́ТЬ** *несов. см.* **освежи́ть**

**ОСВЕЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **освежи́ться** **2.** *страд. от* **освежа́ть**

**ОСВЕЖЕВА́ТЬ** *сов. что* тунау, эсен алыу (*йәнлектең*)

**ОСВЕЖЕ́НИЕ** *с см.* **освежи́ть** — **освежа́ть, освежи́ться** — **освежа́ться**

**ОСВЕЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*сделать свежим*) сафландырыу, еләҫләндереү, елләтеү **2.** *кого-что* (*восстановить силы*) көс (хәл) биреү, еңеләйтеп ебәреү; **купа́ние освежа́ет** һыу инеү еңеләйтеп ебәрә **3.** *что* яңыртыу; **освежи́ть кра́ски** буяуҙы яңыртыу **4.** *что* хәтергә (иҫкә) төшөрөү; **освежи́ть воспомина́ния** иҫтәлектәрҙе хәтергә төшөрөү

**ОСВЕЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать свежим*) сафланыу, еләҫләнеү **2.** (*восстановить свои силы*) хәл алыу (кереү), еңеләйеп китеү, тынысланыу **3.** (*восстановиться в памяти*) хәтергә (иҫкә) төшөү, хәтергә килеү

**ОСВЕТИ́ТЕЛЬ** *м*; *театр.* яҡтыртыусы, сәхнә яҡтыртыусыһы

**ОСВЕТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое яҡтыртыу ...ы, яҡтырта торған, яҡтыртҡыс; **освети́тельный прибо́р** яҡтыртыу приборы; **освети́тельные раке́ты** яҡтырта торған ракеталар

**ОСВЕТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* яҡтыртыу; **со́лнце освети́ло верши́ны гор** ҡояш тау түбәләрен яҡтыртты **2.** *что*; *перен.* нурландырыу, йәнләндереү, дәртләндереү, нурландырып (йәнләндереп, дәртләндереп, яҡтыртып) ебәреү; **улы́бка освети́ла её лицо́** йылмайыу уның йөҙөн яҡтыртып ебәрҙе **3.** *что*; *перен.* (*изложить, истолковать что-л.*) аңлатып биреү, төшөндөрөү, һөйләп биреү, яҡтыртыу; **освети́ть положе́ние** хәлде аңлатып биреү

**ОСВЕТИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прям., перен.* яҡтырыу, балҡыу, нурланыу, яҡтырып (балҡып, нурланып) китеү

**ОСВЕЩА́ТЬ** *несов. см.* **освети́ть**

**ОСВЕЩА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **освети́ться** **2.** *страд. от* **освеща́ть**

**ОСВЕЩЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **освети́ть** — **освеща́ть**; **освеще́ние у́лицы** урамды яҡтыртыу **2.** яҡтылыҡ; **иску́сственное освеще́ние** яһалма яҡтылыҡ **3.** *перен.* яҡтыртыу, аңлатма; **освеще́ние фа́ктов** фактарҙы яҡтыртыу (аңлатыу)

**ОСВЕЩЁННОСТЬ** *ж*; *физ.* яҡтыртылыш, яҡтыртылғанлыҡ, яҡтыртылыу дәрәжәһе; **едини́ца освещённости** яҡтыртылыш берәмеге

**ОСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАНИЕ** *с см.* **освиде́тельствовать**

**ОСВИДЕ́ТЕЛЬСТВОВАТЬ** *сов. кого-что* ҡарау, ҡарап (тикшереп) сығыу; **освиде́тельствовать больно́го** ауырыуҙы ҡарап сығыу

**ОСВИСТА́ТЬ** *сов. кого-что* ризаһыҙлыҡ белдереп (хурлап) һыҙғырыу

**ОСВИ́СТЫВАТЬ** *несов. см.* **освиста́ть**

**ОСВОБОДИ́ТЕЛЬ** *м* азат итеүсе, ҡотҡарыусы

**ОСВОБОДИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое азатлыҡ ...ы, ирек ...ы; **освободи́тельное движе́ние** азатлыҡ хәрәкәте

**ОСВОБОДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*сделать свободным*) азат итеү, ирекkә сығарыу, ҡотҡарыу; **освободи́ть люде́й от ра́бства** халыҡты ҡоллоҡтан ҡотҡарыу **2.** *кого-что* (*высвободить*) ысҡындырыу; **освободи́ть зве́ря от пут** йәнлекте сынйырҙан ысҡындырыу **3.** *от чего* (*избавить*) азат итеү, ҡотҡарыу, бушатыу; **освободи́ть от дежу́рства** дежурлыҡтан азат итеү **4.** *кого* (*снять с должности*) сығарыу, алыу, бушатыу **5.** *что* (*сделать пустым*) бушатыу; **освободи́ть ба́нку из-под варе́нья** ҡайнатманан банканы бушатыу **6.** *что*; *перен.* (*сделать свободным с какой-л. целью*) (ваҡытты) буш итеү, буш ваҡыт ҡалдырыу

**ОСВОБОДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*стать свободным*) азат булыу, ирекkә сығыу, ҡотолоу, ирекле булыу; **освободи́ться из пле́на** әсирлектән ҡотолоу **2.** (*высвободиться*) ысҡыныу **3.** (*избавиться от чего-л. нежелательного*) бушау, арыныу, ҡотолоу **4.** (*стать незанятым*) бушау; **ме́сто освободи́лось** урын бушаны

**ОСВОБОЖДА́ТЬ** *несов. см.* **освободи́ть**

**ОСВОБОЖДА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **освободи́ться 2.** *страд. от* **освобожда́ть**

**ОСВОБОЖДЕ́НИЕ** *с см.* **освободи́ть, освободи́ться**; **освобожде́ние рабо́чего кла́сса** эшсе синыфын азат итеү

**ОСВОЕ́НИЕ** *с см.* **осво́ить**; **освое́ние целины́** сиҙәм үҙләштереү; **освое́ние но́вой те́хники** яңы техниканы үҙләштереү

**ОСВО́ИТЬ** *сов. что* үҙләштереү, эйә булыу; **осво́ить но́вую профе́ссию** яңы һөнәр үҙләштереү

**ОСВО́ИТЬСЯ** *сов.* эйәләшеү, үҙләшеү, күнегеү, күнегеп китеү, өйрәнеү; **бы́стро осво́иться в де́тском саду́** балалар баҡсаһына тиҙ эйәләшеү **2.** *с чем* (*постичь, усвоить что-л.*) үҙләштереү, төшөнөү, үҙләштереп (төшөнөп) алыу

**ОСВЯТИ́ТЬ** *сов. что*; *церк.* изгеләндереү, изге итеү, изгегә һанау

**ОСВЯЩА́ТЬ** *несов. см.* **освяти́ть**

**ОСВЯЩЕ́НИЕ** *с см.* **освяти́ть — освяща́ть**

**ОСЕВО́Й,** -ая, -ое күсәр ...ы; **осева́я ли́ния** күсәр һыҙығы

**ОСЕДА́ТЬ** *несов. см.* **осе́сть**

**ОСЕДЛА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* эйәрләү; **оседла́ть коне́й** аттарҙы эйәрләү **2.** *кого-что*; *разг.* (*сесть верхом*) атланып ултырыу; **оседла́ть стул** ултырғысҡа атланып ултырыу **3.** *кого-что*; *перен., разг.* (*подчинить себе*) елкәһенә ултырыу, буйһондороу

**ОСЕ́ДЛОСТЬ** *ж* ултыраҡлылыҡ, ултыраҡ тормош

**ОСЁДЛЫВАТЬ** *несов. см.* **оседла́ть**

**ОСЕ́ДЛЫЙ,** -ая, -ое ултыраҡ; **осе́длые племена́** ултыраҡ ҡәбиләләр

**ОСЕКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **осе́чься**

**ОСЁЛ** *м*; *прям., перен.* ишәк

**ОСЕЛО́К** *м* **1.** (*точильный камень*) беләү, ҡайраҡ **2.** *спец.* һынау ташы (*ҡиммәтле металдарҙы*)

**ОСЕМЕНЕ́НИЕ** *с см.* **осеменить — осеменя́ть**; **иску́сственное осемене́ние живо́тных** хайуандарҙы яһалма аталандырыу **2.** *биол.* аталаныу, аталандырыу

**ОСЕМЕНИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *спец.* яһалма аталандырыу

**ОСЕМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **осемени́ть**

**ОСЕНИ́ТЬ** *сов. кого* ҡапыл башҡа (аҡылға) килеү, иҫенә килеү (төшөү); **его́ осени́ла блестя́щая иде́я** ҡапыл уның башына бик шәп идея килде

**ОСЕ́ННИЙ,** -яя, -ее көҙгө; **осе́нние цветы́** көҙгө сәскәләр

**О́СЕНЬ** *ж* көҙ

**О́СЕНЬЮ** *нареч.* көҙөн, көҙ көнө, көҙләктә

**ОСЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **осени́ть**

**ОСЕ́СТЬ** *сов.* **1.** сүгеү, ултырыу, баҫылыу; **дом осе́л** өй баҫылған **2.** (*о человеке или животном*) ултырыу, ултыра төшөү, сүгеү **3.** ҡаплау, ҡуныу, ултырыу; **пыль осе́ла** туҙан ҡунған **4.** (*выделиться из раствора в виде осадка*) ултырыу **5.** (*поселиться*) ултыраҡ тормошҡа күсеү, ултыраҡланыу

**ОСЕТИ́НСКИЙ,** -ая, -ое осетин(дар) ...ы, Осетия ...ы; **осети́нский язы́к** осетин теле

**ОСЕТИ́НЫ** *мн.* осетиндар, осетин халҡы // *ед.* **осети́н** *м* осетин ир-аты; **осети́нка** *ж* осетин ҡатын-ҡыҙы

**ОСЁТР** *м* бикре

**ОСЕТРИ́НА** *ж* бикре ите

**ОСЕТРО́ВЫЙ,** -ая, -ое **1.** бикре ...ы; **осетро́вая икра́** бикре ыуылдырығы **2.** *в знач. сущ.* **осетро́вые** *мн.*; *зоол.* бикре һымаҡтар

**ОСЕ́ЧКА** *ж* **1.** атылмай ҡалыу, осечка; **ружьё дало́ осе́чку** мылтыҡ атылмай ҡалды (осечка бирҙе) **2.** *перен., разг.* (*неудача*) уңышһыҙлыҡ, эш барып сыҡмау, кире һөҙөмтә

**ОСЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** *перен., разг.* (*потерпеть неудачу*) абыныу, уңышһыҙлыҡҡа осрау **2.** (*запнуться*) тотлоғоп ҡалыу, һөйләүҙән ҡапыл туҡтау

**ОСИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **оси́лить**

**ОСИ́ЛИТЬ** *сов. кого-что*; *прям., перен.* еңеү, еңеп сығыу, йырып сығыу; **врагу́ нас не оси́лить** дошман беҙҙе еңеп сыға алмаясаҡ; **оси́лить волне́ние** тулҡынланыуҙы еңеү; **оси́лить англи́йский язы́к** инглиз телен йырып сығыу

**ОСИ́НА** *ж* уҫаҡ

**ОСИ́ННИК** *м* уҫаҡлыҡ, уҫаҡ урманы

**ОСИ́НОВЫЙ,** -ая, -ое **1.** уҫаҡ ...ы; **оси́новый лист** уҫаҡ япрағы **2.** уҫаҡ ...ы, уҫаҡтан эшләнгән

(яһалған); **оси́новый дом** уçаҡ өй ♦ **дрожа́ть (трясти́сь) как оси́новый лист** ныҡ ҡалтырау (дерелдәү)

**ОСИ́НЫЙ,** -ая, -ое һағыҙаҡ ...ы; **оси́ный рой** һағыҙаҡ күсе ♦ **оси́ное гнездо́** ҡоҙғондар ояһы (*бер-береһенә дошман йәки йәмғиәткә зарарлы кешеләр төркөмө һәм уларҙың торған урыны*); **оси́ная та́лия** нескә бил

**ОСИ́ПЛЫЙ,** -ая, -ое ҡарлыҡҡан, ғыжылдауыҡ; **оси́плый го́лос** ҡарлыҡҡан тауыш

**ОСИ́ПНУТЬ** *сов.* ҡарлығыу, ғыжылдау

**ОСИРОТЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое **1.** етем, етем ҡалған; **осироте́лый ребёнок** етем бала **2.** *перен.* эйәһеҙ (кешеһеҙ) ҡалған, буш ҡалған, ташландыҡ; **осироте́лый дом** эйәһеҙ ҡалған өй

**ОСИРОТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** етем ҡалыу **2.** *перен.* буш ҡалыу, эйәһеҙ (кешеһеҙ) булыу

**ОСКА́Л** *м* ыржайған ауыҙ

**ОСКА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **оска́лить**

**ОСКА́ЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **оска́литься**

**ОСКА́ЛИТЬ** *сов. что* ыржайтыу; **оска́лить зу́бы** тештәрҙе ыржайтыу

**ОСКА́ЛИТЬСЯ** *сов.* ыржайыу

**ОСКАЛЬПИ́РОВАТЬ** *сов. кого-что* баш тиреһен тунап алыу

**ОСКАНДА́ЛИТЬСЯ** *сов.* хур булыу, оятҡа (көлкөгә) ҡалыу

**ОСКВЕРНЕ́НИЕ** *с см.* **оскверни́ть — оскверня́ть**

**ОСКВЕРНИ́ТЕЛЬ** *м* бысратыусы, шаҡшылаусы, хурлаусы

**ОСКВЕРНИ́ТЬ** *сов. кого-что* хур итеү, бысратыу, тап төшөрөү, ҡара яғыу

**ОСКВЕРНИ́ТЬСЯ** *сов.* бысраныу, шаҡшыланыу

**ОСКВЕРНЯ́ТЬ** *несов. см.* **оскверни́ть**

**ОСКВЕРНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оскверни́ться 2.** *страд. от* **оскверня́ть**

**ОСКЛА́БИТЬ: оскла́бить лицо́** *разг.* ауыҙ йырып көлөү

**ОСКЛА́БИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ауыҙ йырып көлөү

**ОСКО́ЛОК** *м* **1.** ярсыҡ, ватыҡ; **оско́лок снаря́да** снаряд ярсығы **2.** *перен.* ҡалдыҡ; **оско́лок ста́рого ми́ра** иҫке донъя ҡалдығы

**ОСКО́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ярсыҡ ...ы; **оско́лочное ране́ние** ярсыҡ яраһы **2.** ярсыҡлы; **оско́лочная бо́мба** ярсыҡлы бомба

**ОСКО́МИНА** *ж* ҡамашыу, ҡурышыу, теш ҡамаштырыу; **оско́мина от клю́квы** мүк еләгенән ауыҙ ҡурышыу ♦ **наби́ть оско́мину** теңкәгә тейеү, туйҙырып (йөҙәтеп) бөтөү

**ОСКОПИ́ТЬ** *сов. кого* бестереү, көйҙөрөү, һылыулау (*малды*)

**ОСКОПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **оскопи́ть**

**ОСКОРБИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое кәмһетеүле, хурлыҡлы, мыҫҡыллы

**ОСКОРБИ́ТЬ** *сов. кого-что* мыҫҡыл итеү, мыҫҡыллау, кәмһетеү ♦ **оскорби́ть де́йствием** һуғыу, сикәгә сабыу, яңаҡлау

**ОСКОРБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **оскорби́ть**

**ОСКОРБЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оскорби́ться 2.** *страд. от* **оскорбля́ть**

**ОСКУДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **оскуде́ть**

**ОСКУДЕ́ТЬ** *сов.* ярлыланыу, фәҡирләнеү

**ОСЛАБЕВА́ТЬ** *несов. см.* **ослабе́ть**

**ОСЛАБЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* көсһөҙләнгән, хәлһеҙләнгән

**ОСЛАБЕ́ТЬ** *сов.* **1.** көсһөҙләнеү, хәлһеҙләнеү; **больно́й ослабе́л** ауырыу хәлһеҙләнгән **2.** (*притупиться*) насарайыу, насарланыу; **зре́ние ослабе́ло** күҙҙәр насарайҙы **3.** (*уменьшится*) баҫылыу, йомшарыу, кәмеү, баҫыла (йомшара, кәмей) төшөү; **ве́тер ослабе́л** ел баҫыла төштө; **дисципли́на ослабе́ла** тәртип йомшарҙы **4.** *что* бушау; **реме́нь ослабе́л** ҡайыш бушаған

**ОСЛА́БИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* көсһөҙләндереү, хәлһеҙләндереү, быуынды бөтөрөү; **боле́знь осла́била его́** ауырыу уны хәлһеҙләндерҙе **2.** *что* кәметеү, йомшартыу; **осла́бить внима́ние** иғтибарҙы кәметеү; **осла́бить воспита́тельную рабо́ту** тәрбиә эшен йомшартыу **3.** бушатыу, бушата төшөү; **осла́бить пово́дья** теҙгенде бушата төшөү

**ОСЛАБЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **осла́бить — ослабля́ть 2.** *см.* **ослабе́ть**; **ослабле́ние па́мяти** хәтерҙең насарайыуы

**ОСЛАБЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **осла́бить**

**ОСЛА́БНУТЬ** *сов.*; *разг. см.* **ослабе́ть**

**ОСЛА́ВИТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* исемен (яманатын) һатыу, данын сығарыу, ғәйбәт таратыу

**ОСЛА́ВЛЯТЬ** *несов. см.* **осла́вить**

**ОСЛЕПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** күҙ сағылдырғыс (сағылдырырлыҡ), үтә яҡты, яп-яҡты; **ослепи́тельное со́лнце** күҙ сағылдырғыс ҡояш **2.** *разг.* күҙ ҡамаштырырлыҡ аҡ; **ослепи́тельная ска́терть** күҙ ҡамаштырырлыҡ аҡ ашъяулыҡ **3.** *перен.* иҫ киткес, таң ҡалдырғыс (ҡалдырырлыҡ), һоҡландырғыс, ғәжәп; **ослепи́тельная красота́** һоҡландырғыс һылыулыҡ

**ОСЛЕПИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*лишить зрения*) һуҡырайтыу, күҙҙән яҙҙырыу, күҙһеҙ ҡалдырыу **2.** (*лишить на время способности видеть*) күҙҙе сағылдырыу **3.** *перен.* (*поразить*) таң ҡалдырыу, хайран ҡалдырыу, һоҡландырыу, күҙ яуын алыу **4.** *перен.* аҡылын юғалтыу (юйыу), күҙ томалау, яңылыштырыу; **гнев ослепи́л его́** асыу уның аҡылын юйҙы

**ОСЛЕПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ослепи́ть — ослепля́ть 2.** *перен.* күҙ томалау, нимә эшләгәнеңде белмәү; **увлека́ться до ослепле́ния** күҙ томаланғансы мауығыу

**ОСЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **ослепи́ть**

**ОСЛЕ́ПНУТЬ** *сов.* **1.** (*лишиться зрения*) һуҡырайыу, күҙһеҙ ҡалыу, күҙҙән яҙыу **2.** (*вре-*

*менно потерять способность видеть*) күҙ сағылыу; **ослéпнуть от снéжного блéска** ҡар ялтырауынан күҙ сағылыу **3.** *перен.* (*перестать понимать совершающееся*) аҡыл юғалыу (юйылыу), күҙ томаланыу, яңылышыу

**ОСЛИ́ЗЛЫЙ,** -ая, -ое лайлалы, тайғаҡ; **осли́злые грибы́** лайлалы бәшмәктәр

**ОСЛИ́ЗНУТЬ** *сов.* лайлаланыу, тайғаҡланыу

**ОСЛИ́НЫЙ,** -ая, -ое ишәк ...ы; **осли́ные у́ши** ишәк ҡолағы

**ОСЛИ́ЦА** *ж* инә ишәк

**ОСЛОЖНÉНИЕ** *с* **1.** *см.* **осложни́ть** — **осложня́ть**, **осложни́ться** **2.** (*препятствие*) тотҡарлыҡ, ҡамасау, ҡыйынлыҡ, ҡатмарлылыҡ **3.** өҙлөгөү; **осложнéние пóсле гри́ппа** гриптан һуң өҙлөгөү

**ОСЛОЖНИ́ТЬ** *сов. что* ҡыйынлаштырыу, ҡатмарландырыу, ауырлаштырыу

**ОСЛОЖНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡыйынлашыу, ҡатмарланыу, ауырлашыу **2.** *чем* (*о болезни*) өҙлөгөү, өҙлөгөп ҡалыу

**ОСЛОЖНЯ́ТЬ** *несов. см.* **осложни́ть**

**ОСЛОЖНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **осложни́ться** **2.** *страд. от* **осложня́ть**

**ОСЛУ́ШАТЬСЯ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡушҡанды тыңламау (эшләмәү), буйһонмау, баш бирмәү, ҡарышыу

**ОСЛЫ́ШАТЬСЯ** *сов.* яңылыш ишетеү

**ОСМА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **осмоли́ть**

**ОСМА́ТРИВАТЬ** *несов. см.* **осмотрéть**

**ОСМА́ТРИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **осмотрéться** **2.** *страд. от* **осма́тривать**

**ОСМÉИВАТЬ** *несов. см.* **осмея́ть**

**ОСМЕЛÉТЬ** *сов.* ҡыйыуланыу, баҙнатланыу

**ОСМÉЛИВАТЬСЯ** *несов. см.* **осмéлиться**

**ОСМÉЛИТЬСЯ** *сов. на что* и *с неопр.* ҡыйыуланыу, баҙыу, баҙнат итеү

**ОСМЕЯ́НИЕ** *с см.* **осмея́ть**

**ОСМЕЯ́ТЬ** *сов. кого-что* көлөү, көлкөгә ҡалдырыу

**ОСМОЛИ́ТЬ** *сов. что* ыҫмалалау, ыҫмалалап сығыу, ыҫмала менән ҡаплау

**ОСМÓЛКА** *ж см.* **осмоли́ть** — **осма́ливать**; **осмóлка па́лубы** палубаны ыҫмалалау

**ÓСМОС** *м*; *физ.* осмос (*иреткес матдәнең йоҡа ғына яры аша иретмәгә үтеп инеүе, һарҡыуы*)

**ОСМÓТР** *м см.* **осмотрéть** — **осма́тривать**; **врачéбный осмóтр** врач ҡарауы

**ОСМОТРÉТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡарау, ҡарап сығыу, байҡау, күҙҙән уҙғарыу (күсереү), ҡарап танышып сығыу; **осмотрéть вы́ставку** күргәҙмәне ҡарап сығыу **2.** ҡарау, тикшереү; **осмотрéть больнóго** ауырыуҙы тикшереү

**ОСМОТРÉТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡараныу, ҡаранып алыу **2.** *перен.* (*ознакомиться*) танышып сығыу, эйәләшеү; **осмотрéться в нóвом гóроде** яңы ҡала менән танышыу

**ОСМОТРИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* һаҡлыҡ, алдын-артын ҡарау; **прояви́ть осмотри́тельность** һаҡлыҡ күрһәтеү

**ОСМОТРИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое һаҡ, алдын-артын уйлаусан, ипле; **осмотри́тельный человéк** һаҡ кеше

**ОСМÓТРЩИК** *м* тикшереүсе, ҡарап тикшереп тороусы

**ОСМЫСЛÉНИЕ** *с см.* **осмы́слить** — **осмысля́ть**; **осмыслéние прочи́танного** уҡығанды аңлау

**ОСМЫ́СЛЕННОСТЬ** *ж* аҡыл менән (уйлап) эшләгәнлек; **осмы́сленность дéйствий** хәрәкәттәрҙең уйлап эшләнгәнлеге

**ОСМЫ́СЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич.* от **осмы́слить** **2.** *прил.* аҡыл менән эшләнгән, аңлы, уйланған, мәғәнәле; **осмы́сленный взгляд** мәғәнәле ҡараш

**ОСМЫ́СЛИВАТЬ** *несов. см.* **осмы́слить**

**ОСМЫ́СЛИТЬ** *сов. что* аңлау, төшөнөү, аңлап (төшөнөп) етеү

**ОСМЫСЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **осмы́слить**

**ОСНАСТИ́ТЬ** *сов. что* **1.** *мор.* йыһазландырыу, (ҡорамал менән) тәьмин итеү (*судноны*); **оснасти́ть су́дно** судноны йыһазландырыу **2.** тәьмин итеү; **оснасти́ть хозя́йство тéхникой** хужалыҡты техника менән тәьмин итеү

**ОСНА́СТКА** *ж* **1.** *см.* **оснасти́ть** — **оснаща́ть** **2.** (*снасти*) йыһаз, ҡорамал

**ОСНАЩА́ТЬ** *несов. см.* **оснасти́ть**

**ОСНАЩÉНИЕ** *с* **1.** *см.* **оснасти́ть** 2; **2.** ҡорамалландырыу, йыһазландырыу

**ОСНАЩЁННОСТЬ** *ж* йыһазландырылыу кимәле, тәьмин ителеш, йыһазлан(дырыл)ған булыу; **техни́ческая оснащённость** техник яҡтан йыһазланған булыу

**ОСНÓВА** *ж* **1.** (*остов*) нигеҙ, төп **2.** *мн.* **оснóвы** нигеҙҙәр; **оснóвы зна́ний** белем нигеҙҙәре **3.** *текст.* буйлыҡ, буй еп, буй **4.** *грам.* нигеҙ ♦ **класть в оснóву** нигеҙ итеп алыу; **лечь в оснóву** *чего* нигеҙ булып тороу; **на оснóве** *чего* таянып

**ОСНОВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **основа́ть** **2.** һалыу, һалыныу, барлыҡҡа килеү, төҙөлөү; **столéтие основа́ния гóрода** ҡалаға нигеҙ һалыныуҙың йөҙ йыллығы **3.** (*фундамент*) нигеҙ; **иску́сственное основа́ние** яһалма нигеҙ **4.** (*причина, повод*) нигеҙ, сәбәп, һылтау, ерлек; **без вся́кого основа́ния** һис бер нигеҙһеҙ; **на какóм основа́нии?** ни сәбәпле? **5.** *мат.* нигеҙ; **основа́ние треугóльника** өсмөйөш нигеҙе **6.** *хим.* нигеҙ; **органи́ческие основа́ния** органик нигеҙҙәр ♦ **до основа́ния** бөткәнсе, нигеҙенә (төбөнә) тиклем

**ОСНОВА́ТЕЛЬ** *м* нигеҙ һалыусы, ойоштороусы, башлаусы

**ОСНОВА́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* нигеҙлелек, төплөлөк

**ОСНОВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*веский*) нигеҙле, төплө; **основа́тельный дóвод** нигеҙле дә-

лил **2.** (*дельный, положительный*) эшлекле, төплө, олпат; **основа́тельный челове́к** төплө кеше **3.** (*крепкий, прочный*) нык; **основа́тельная постро́йка** нык төҙөлөш **4.** *разг.* (*значительный по размеру, весу и т.п.*) байтаҡ ҙур, ярайһы, ауыр

**ОСНОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** нигеҙ (һалыу) ҡороу, төҙөү, ойоштороу; **основа́ть го́род** ҡалаға нигеҙ һалыу **2.** *на чём* нигеҙләү, дәлилләү; **основа́ть вы́воды на фа́ктах** һығымталарҙы факттар менән дәлилләү

**ОСНОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*возникнуть*) барлыҡҡа килеү, нигеҙ һалыныу, ҡоролоу, төҙөлөү; **основа́лось но́вое о́бщество** яңы йәмғиәт барлыҡҡа килде **2.** (*расположиться, поселиться*) нигеҙләнеү, төпләнеү, урынлашыу; **основа́ться на но́вом ме́сте** яңы урынға (ергә) төпләнеү

**ОСНОВНО́Й,** -ая, -ое **1.** төп, иң мөһим, иң әһәмиәтле; **основна́я цель** төп маҡсат **2.** *в знач. сущ.* **основно́е** *с* төп мәсьәлә, иң мөһим нәмә ♦ **в основно́м** нигеҙҙә, дөйөм алғанда; **основно́й капита́л** *эк.* төп капитал

**ОСНО́ВНЫЙ I** -ая, -ое *текст.* буй ...ы, буйлыҡ; **осно́вные ни́ти** буйлыҡ ептәр

**ОСНО́ВНЫЙ II,** -ая, -ое *хим.* нигеҙ ...ы, нигеҙле; **осно́вные о́кислы** нигеҙ окиселдары

**ОСНОВОПОЛАГА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее нигеҙ булып тороусы (торған), төп, нигеҙ; **основополага́ющие труды́ по тео́рии** теорияға нигеҙ булып торған хеҙмәттәр

**ОСНОВОПОЛО́ЖНИК** *м* нигеҙ һалыусы

**ОСНО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **основа́ть**

**ОСНО́ВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **основа́ться** **2.** *на чём* таяныу, нигеҙләнеү; **осно́вываться на фа́ктах** факттарға нигеҙләнеү **3.** *страд. от* **осно́вывать**

**ОСО́БА** *ж*; *ирон.* кеше, шәхес; **почте́нная осо́ба** хөрмәтле (олпат) кеше ♦ **свое́й (со́бственной) осо́бой** үҙе

**ОСО́БЕННО** *нареч.* бигерәк тә, айырыуса, айырата, бик үк; **осо́бенно ва́жный** айырыуса мөһим; **он осо́бенно люби́л наро́дные пе́сни** ул айырыуса халыҡ йырҙарын ярата ине ♦ **не осо́бенно** бик үк түгел, шулай уҡ түгел

**ОСО́БЕННОСТЬ** *ж* үҙенсәлек, айырымлылыҡ; **одна́ из осо́бенностей произво́дства** етештереү үҙенсәлектәренең береһе; **осо́бенность хара́ктера** холоҡ үҙенсәлеге ♦ **в осо́бенности** иң элек, беренсе сиратта, иң тәүҙә

**ОСО́БЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** үҙенә бер төрлө, үҙенә башҡа, үҙенсәлекле; **отлича́ться осо́бенной музыка́льностью** үҙенә башҡа музыкаллек менән айырылып тороу **2.** (*специальный*) махсус

**ОСОБНЯ́К** *м* айырым йорт; **жить в особняке́** айырым йортта йәшәү

**ОСОБНЯКО́М** *нареч.* айырым, яңғыҙ, бер үҙе, башҡаларҙан ситтә; **держа́ться особняко́м** башҡаларҙан ситтә булыу; **жить особняко́м** айырым йәшәү

**ОСО́БЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*особенный, необычный*) үҙенә башҡа, үҙенә бер төрлө; **осо́бая интона́ция** үҙенә башҡа интонация **2.** (*отдельный*) айырым, махсус; **осо́бая коми́ссия** махсус комиссия

**О́СОБЬ** *ж* зат, шәхес, айырым нәмә

**ОСОВЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг. см.* **осолове́лый**

**ОСОВЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* мәлйерәү, бәлйерәү, мәлйерәп (бәлйерәп) төшөү, хәлһеҙләнеү

**ОСОВРЕМЕ́НИВАТЬ** *несов. см.* **осовреме́нить**

**ОСОВРЕМЕ́НИТЬ** *сов. что* заманса итеү, замансалау, замансалаштырыу; **осовреме́нить пье́су** пьесаны замансалау

**ОСОЗНАВА́ТЬ** *несов. см.* **осозна́ть**

**ОСОЗНА́НИЕ** *с см.* **осозна́ть**; **осозна́ние опа́сности** ҡурҡыныс барлығын аңлау

**ОСОЗНА́ТЬ** *сов. что* аңлау, төшөнөү, аңлап (төшөнөп) етеү; **осозна́ть свою́ вину́** үҙ ғәйебеңде аңлау

**ОСО́КА** *ж* күрән; **осо́ка берегова́я** яр күрәне; **осо́ка бледнова́тая** аҡһыл күрән; **осо́ка воло́систая** төклө күрән; **осо́ка игли́стая** энәле күрән

**ОСОКО́РНИК** *м* күк тирәклек

**ОСОКО́РЬ** *м*; күк тирәк

**ОСОЛОВЕ́ТЬ** *сов.* бәлйерәү, мәлйерәү, хәлһеҙләнеү, иҙрәү

**ОСОЛОВЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое (*невыразительный, полусонный*) мәлйерәп төшкән, бәлйерәгән, хәлһеҙләнгән, тонған; **осолове́лый вид** мәлйерәгән ҡиәфәт; **осолове́лые глаза́** тонған күҙҙәр

**ОСО́Т** *м* билсән; **осо́т боло́тный** һаҙ билсәне; **осо́т жёлтый** һары билсән

**О́СПА** *ж*; *мед.* сәсәк; **чёрная о́спа** ҡара сәсәк ♦ **ветряна́я (ве́тряная) о́спа** һыу сәсәге

**ОСПА́РИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **оспо́рить** **2.** *что* даулау, алырға тырышыу, дәғүәләү, дәғүәләшеү; **оспа́ривать пе́рвую пре́мию** беренсе премияны даулау

**О́СПЕННЫЙ,** -ая, -ое сәсәк ...ы; **о́спенный больно́й** сәсәк менән ауырыусы

**О́СПИНА** *ж* шаҙра, сәсәк шаҙраһы

**ОСПОПРИВИВА́НИЕ** *с* сәсәк һалыу (һалдырыу)

**ОСПОПРИВИВА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое сәсәк һалыу ...ы; **оспопривива́тельный пункт** сәсәк һалыу пункты

**ОСПО́РИТЬ** *сов. что* ҡаршы килеү, килешмәү, ризалашмау, ризаһыҙлыҡ белдереү; **оспо́рить мне́ние** *чьё-л. кемдеңдер* фекеренә ҡаршы килеү

**ОСРАМИ́ТЬ** *сов. кого-что* оятҡа ҡалдырыу, оятлы итеү, хур итеү

**ОСРАМИ́ТЬСЯ** *сов.* оятҡа ҡалыу, оятлы булыу, хур булыу

**ОСТ** *м* **1.** *мор.* (*восточное направление*) көнсығыш **2.** *мор.*, *метеор.* (*восточный ветер*) көнсығыш еле

**ОСТАВА́ТЬСЯ** *несов. см.* **оста́ться**

**ОСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡалдырыу; **оста́вить де́ньги до́ма** аҡсаны өйҙә ҡалдырыу **2.** *что* (*сохранить, приберечь*) ҡалдырыу; **оста́вить карто́фель на семена́** орлоҡҡа картуф ҡалдырыу **3.** *что* (*передать по наследству*) ҡалдырыу, биреп ҡалдырыу; **оста́вить состоя́ние** мөлкәт ҡалдырыу **4.** *кого-что* ҡалдырыу; **оста́вить ко́мнату неу́бранной** бүлмәне йыйыштырмайынса ҡалдырыу **5.** *кого-что, без чего* -һыҙ/ -һеҙ ҡалдырыу; **оста́вить без сла́дкого** тәмтомһоҙ ҡалдырыу; **оста́вить про́сьбу без внима́ния** үтенесте иғтибарһыҙ ҡалдырыу **6.** *кого-что* ҡалдырыу, алып ҡалыу; **оста́вить госте́й ночева́ть** ҡунаҡтарҙы ҡунырға алып ҡалыу **7.** *кого-что* ташлау, ҡалдырыу, ташлап (ҡалдырып) китеү; **оста́вить друзе́й** дуҫтарҙы ташлау **8.** *что* и *с неопр.* (*перестать заниматься чем.-л.*) туҡтатыу, өҙөү, сик ҡуйыу; **оста́вить футбо́л** футбол (уйнауҙы) туҡтатыу; **оста́вить разгово́р** һөйләшеүҙе туҡтатыу **9.** *кого*; *перен.* бөтөү, юҡ булыу, китеү; **созна́ние оста́вило меня́** һушым китте ♦ **оста́вить в дурака́х (дурако́м)** төпһөҙ санаға ултыртыу, кәкре ҡайынға терәтеү, алданыу, һемәйеү; **оста́вить в поко́е** тыныс ҡалдырыу, тынғы биреү, борсомау, теймәү; **оста́вить за собо́й** *кого-что*: 1) (*удалиться, уйдя вперёд*) йыраҡлашыу, артта ҡалдырыу; 2) (*опередить в каком-л. отношении*) уҙып китеү, артта ҡалдырыу; **оста́вить за собо́й** *что* (*закрепить за собой*) үҙеңә беркетеү; **оста́вить с но́сом** ҡоро (буш) ҡалдырыу, төп башына ултыртыу; **ка́мня на ка́мне не оста́вить** ер менән тигеҙләү, көлөн күккә осороу

**ОСТАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **оста́вить** ♦ **оставля́ет жела́ть лу́чшего** бик шәптән түгел

**ОСТАЛЬНО́Й,** -ая, -ое **1.** (*прочий*) ҡалған, башҡа, бүтән; **остально́е вре́мя** ҡалған ваҡыт **2.** *в знач. сущ.* **остально́е** *с* ҡалған(ы), башҡа(һы), бүтән(е); **остально́е возьмём за́втра** ҡалғанын иртәгә алырбыҙ **3.** *в знач. сущ.* **остальны́е** *мн.* башҡалар, ҡалғандар, бүтәндәр; **где остальны́е?** башҡалар ҡайҙа?

**ОСТАНА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **останови́ть**

**ОСТАНА́ВЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **останови́ться 2.** *страд. от* **остана́вливать**

**ОСТА́НКИ** *только мн.* үлек, мәйет

**ОСТАНОВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* туҡтатыу, туҡтатып ҡуйыу; **останови́ть ло́шадь** атты туҡтатыу; **останови́ть часы́** сәғәтте туҡтатып ҡуйыу **2.** *кого-что* (*сдержать, запретить*) туҡтатыу, тыйыу, баҫыу; **останови́ть боль** ауыртыуҙы баҫыу; **останови́ть шалуна́** шаянды тыйыу **3.** *что, на ком-чём* (*сосредоточить, направить на кого-что-л.*) төшөрөү, ташлау, төбәү, йүнәлдереү; **останови́ть внима́ние** иғтибарҙы йүнәлтеү; **останови́ть взор** күҙ төбәү

**ОСТАНОВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** туҡтау, туҡталыу, туҡтап (туҡталып) ҡалыу; **останови́ться пе́ред воро́тами** ҡапҡа алдында туҡтау **2.** *на ком-чём* (*сосредоточиться — о мыслях, внимании и т.п.*) туҡталыу, туҡталып үтеү (тороу) **3.** *на ком-чём* (*прийти к заключению, склониться к кому-чему-л.*) туҡталыу, һығымтаға килеү, риза булыу, күнеү **4.** (*временно расположиться*) туҡтау, туҡталыу, төшөү; **останови́ться в гости́нице** ҡунаҡханаға төшөү

**ОСТАНО́ВКА** *ж* **1.** *см.* **останови́ть** 1, **останови́ться** 1; **2.** (*перерыв, пауза*) туҡталыш, пауза, туҡталыу, туҡтап тороу (*һүҙҙә, хәрәкәттә һ.б.*); **писа́ть без остано́вок** туҡтамайынса яҙыу **3.** (*место*) туҡталыш, туҡтау урыны; **трамва́йная остано́вка** трамвай туҡталышы ♦ **остано́вка за** *кем-чем кемдер* (*нимәлер*) етмәүҙән (булмауҙан, юҡлыҡтан)

**ОСТАНО́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое туҡтау ...ы, туҡталыу ...ы, туҡтатыу ...ы; **остано́вочный механи́зм** туҡтатыу механизмы

**ОСТА́ТОК** *м* **1.** ҡалдыҡ, ҡалған өлөш; **оста́ток пути́** юлдың ҡалған өлөшө; **оста́ток пирога́** бәлештең ҡалған өлөшө; **оста́ток о́тпуска** отпускының ҡалған өлөшө; **оста́ток до́лга** бурыстың ҡалғаны **2.** *обычно мн.* **оста́тки** ҡалдыҡтар; **оста́тки зоологи́ческой колле́кции** зоология коллекцияһының ҡалдыҡтары **3.** *обычно мн.* **оста́тки** (*отходы*) ҡалдыҡ; **нефтяны́е оста́тки** нефть ҡалдыҡтары **4.** *мат.* ҡалдыҡ ♦ **без оста́тка** тотош, тулыһынса, ҡалдыҡһыҙ

**ОСТА́ТОЧНЫЙ,** -ая, -ое ҡалдыҡ; **оста́точные су́ммы** ҡалдыҡ суммалар; **оста́точные о́рганы** ҡалдыҡ ағзалар

**ОСТА́ТЬСЯ** *сов.*; *в разн. знач.* ҡалыу; **оста́ться в дере́вне** ауылда ҡалыу; **это́ навсегда́ оста́нется в па́мяти** был мәңгегә хәтерҙә ҡалыр; **оста́ться при своём мне́нии** үҙ фекереңдә ҡалыу; **оста́ться без де́ла** эшһеҙ ҡалыу; **оста́ться в живы́х** үлмәй (тере) ҡалыу ♦ **оста́ться на бума́ге** ҡағыҙҙа ҡалыу, эшкә ашмау; **оста́ться на боба́х** төп башына ултырып ҡалыу; **оста́ться в дурака́х** төпһөҙ санаға ултырыу; **оста́ться ни с чем** бер нәмәһеҙ ҡалыу

**ОСТЕКЛЕНЕ́ТЬ** *сов.* тоноу, йәнһеҙләнеү (*күҙ тураһында*)

**ОСТЕКЛИ́ТЬ** *сов. что* быяла ҡуйыу, быялалау; **остекли́ть ра́му** ҡыҫаға быяла ҡуйыу

**ОСТЕКЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **остекли́ть**

**ОСТЕОЛО́ГИЯ** *ж* остеология (*анатомияла һөйәктәрҙең формаһын һәм төҙөлөшөн өйрәнә торған бүлек*)

**ОСТЕПЕНИ́ТЬ** *сов. кого* аҡылға ултыртыу, баҫынҡыландырыу, баҫалҡыға әйләндереү (баҫалҡыланыу)

**ОСТЕПЕНИ́ТЬСЯ** *сов.* аҡылға ултырыу, баҫынҡыланыу

**ОСТЕПЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **остепени́ть**

**ОСТЕПЕНЯ́ТЬСЯ** *несов. см.* **остепени́ться**

**ОСТЕРВЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* (*неистовый, исступлённый*) ҡоторонған, шашынған, ярһыған

**ОСТЕРВЕНЕ́ТЬ** *сов.* ҡоторонoу, шашыныу, ярһыу

**ОСТЕРВЕНИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг. см.* **остервене́ть**

**ОСТЕРЕГА́ТЬ** *несов. см.* **остере́чь**

**ОСТЕРЕГА́ТЬСЯ** *несов. кого-чего* и *с неопр.* һаҡланыу, һаҡ булыу; **остерега́ться просту́ды** һалҡын тейеүҙән һаҡланыу; **остерега́ться опа́сности** хәүефтән һаҡ булыу

**ОСТЕРЕ́ЧЬ** *сов. кого* (*предупредить, предостеречь*) иҫкәртеү, киҫәтеү, алдан әйтеп ҡуйыу

**ОСТЕРЕ́ЧЬСЯ** *сов. см.* **остерега́ться**

**ОСТИ́СТЫЙ,** -ая, -ое ҡылсыҡлы; **ости́стый ко́лос** ҡылсыҡлы башаҡ

**О́СТОВ** *м* **1.** *тех.* каркас, һөлдә; **о́стов корабля́** карап каркасы **2.** *анат.* һөлдә; **о́стов живо́тного** хайуан һөлдәһе **3.** *перен.* төп фекер, нигеҙ; **о́стов рома́на** романдың нигеҙе

**ОСТО́ЙЧИВЫЙ,** -ая, -ое *мор.* (*о судне*) аумай (ҡапланмай) торған

**ОСТОЛБЕНЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* ҡатып ҡалған, шаҡ ҡатҡан

**ОСТОЛБЕНЕ́ТЬ** *сов.* ҡатып ҡалыу, шаҡ ҡатыу

**ОСТОЛО́П** *м*; *бран.* аңра, миңрәү

**ОСТОРО́ЖНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* артыҡ һаҡ булыу (ҡыланыу), артыҡ һаҡлыҡ күрһәтеү

**ОСТОРО́ЖНОСТЬ** *ж* һаҡлыҡ, абайлыҡ

**ОСТОРО́ЖНЫЙ,** -ая, -ое һаҡ, абай, ипле; **осторо́жный челове́к** һаҡ кеше; **осторо́жное обраще́ние** ипле мөғәмәлә

**ОСТОЧЕРТЕ́ТЬ** *сов. кому*; *разг.* биҙҙереү, туйҙырыу, маҙаға (йәнгә) тейеү, теңкәне ҡоротоу, ялҡытып (туйҙырып) бөтөү

**ОСТРАКИ́ЗМ** *м*; *книжн.* (*изгнание, гонение*) илдән һөрөү (ҡыуыу), эҙәрләү, ҡыҫыу

**ОСТРА́СТКА** *ж*; *разг.* ҡурҡытыу, ҡурҡыу һалыу; **дать остра́стку** ҡурҡыу һалыу

**ОСТРЕ́Ц** *м* ҡыяҡ үлән, тоҙан (*татырлы ерҙә үҫә*)

**ОСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **остри́чь**

**ОСТРИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **остри́чься** **2.** *страд. от* **острига́ть**

**ОСТРИЁ** *с* **1.** ос, йөҙ, үткер яҡ; **остриё иго́лки** энә осо; **остриё ножа́** бысаҡ йөҙө **2.** *перен.* ос, иң үткер яҡ, уҡ; **остриё кри́тики** тәнҡит уғы

**ОСТРИ́ТЬ I** *несов. что* (*делать острым*) ослау, үткерләү, сарлау, ҡайрау

**ОСТРИ́ТЬ II** *несов.* (*говорить остроты*) тапҡыр (йор) һүҙҙәр әйтеү, йорланыу, төртмәләү

**ОСТРИ́ЧЬ** *сов. кого-что* алыу, алдырыу, ҡырҡыу, ҡырҡып алыу; **остри́чь во́лосы** сәс алдырыу; **остри́чь но́гти** тырнаҡ ҡырҡыу; **остри́чь овцу́** һарыҡтың йөнөн ҡырҡыу

**ОСТРИ́ЧЬСЯ** *сов.* сәс алдырыу

**ОСТРО...** *урыҫ телендәге ҡушма һүҙҙәрҙең "осло", "оҙонса", "үткер", "оҙон", "бик", "әҙәттән тыш", "үтә" мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө, мәҫ.*, **острого́ло́вый** осло башлы; **остроинфекцио́нный** үтә йоғошло

**О́СТРОВ** *м* утрау; **о́стров Сахали́н** Сахалин утрауы

**ОСТРОВЕ́РХИЙ,** -ая, -ое осло башлы; **островерхая крыша** осло башлы ҡыйыҡ

**ОСТРОВИТЯ́НИН** *м* и **ОСТРОВИТЯ́НКА** *ж* утрау кешеһе, утрауҙа йәшәүсе

**ОСТРОВНО́Й,** -ая, -ое утрау ...ы, утрауҙағы, утрауҙа урынлашҡан; **островно́й жи́тель** утрауҙа йәшәүсе кеше; **островна́я расти́тельность** утрауҙағы үҫемлек; **островно́е госуда́рство** утрауҙағы дәүләт

**ОСТРОВО́К** *м*; *уменьш. от* **о́стров** утрауыҡ, бәләкәй утрау

**ОСТРО́Г** *м*; *уст.* баструк, төрмә, зиндан

**ОСТРОГА́** *ж* һалдау (*балыҡ сәнсеү ҡоралы*)

**ОСТРОГА́ТЬ** *сов. см.* **обстрога́ть**

**ОСТРОГЛА́ЗЫЙ,** -ая, -ое *разг.* **1.** (*зоркий*) үткер (осло) күҙле **2.** (*с бойкими глазами*) йылтын күҙле

**ОСТРОГУ́БЦЫ** *только мн.*; *спец.* ҡарғаморон

**ОСТРОДЕФИЦИ́ТНЫЙ,** -ая, -ое үтә дефицит, етешмәгән, ихтыяж ҙур; **остродефици́тный това́р** үтә дефицит тауар

**ОСТРОЗАРА́ЗНЫЙ,** -ая, -ое үтә йоғошло; **острозара́зная боле́знь** үтә йоғошло ауырыу

**ОСТРОЗУ́БЫЙ,** -ая, -ое үткер тешле, осло тешле; **острозу́бая борона́** осло тешле тырма

**ОСТРОКОНЕ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое үткер осло (башлы), осло башлы (түбәле); **остроконе́чная ша́пка** осло түбәле бүрек

**ОСТРОЛИ́СТ** *м* осло япраҡ (*мәңге йәшел ағас йәки ҡыуаҡлыҡ*)

**ОСТРОЛИ́ЦЫЙ,** -ая, -ое оҙонса (ябыҡ) йөҙлө; **остроли́цый па́рень** оҙонса йөҙлө егет

**ОСТРОНО́СЫЙ,** -ая, -ое осло танаулы (*кеше*); осло моронло (*хайуан*); осло суҡышлы (*ҡош*); осло башлы (*нәмә*); **остроно́сые боти́нки** осло башлы ботинка

**ОСТРОСЛО́В** *м* сәсән, үткер телле, тапҡыр (йор) һүҙле (кеше)

**ОСТРОСЛО́ВИЕ** *с* тапҡыр (йор) һүҙҙәр әйтеү (әйтә белеү)

**ОСТРОСЛО́ВИТЬ** *несов. см.* **остри́ть** II

**ОСТРО́ТА** *ж* тапҡыр (үткер, йор) һүҙ

**ОСТРОТА́** *ж* **1.** үткерлек; **острота́ ножа́** бысаҡтың үткерлеге **2.** *перен.* үткерлек, зирәклек; **острота́ ума́** аҡылдың зирәклеге; **острота́ зре́ния** күҙҙең үткерлеге **3.** (*пряность*) әселек, ҡырҡыулыҡ, үткерлек; **острота́ за́паха** еҫтең ҡырҡыулығы; **острота́ со́уса** соустың әселеге **4.** *перен.* (*крайняя напряжённость*) киҫкенлек, көсөргәнешлек; **острота́ обстано́вки** хәлдең киҫкенлеге

**ОСТРОУГО́ЛЬНИК** *м*; *мат.* ҡыçынҡы мөйөш

**ОСТРОУГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *мат.* ҡыçынҡы мөйөшлө; **остроуго́льный треуго́льник** ҡыçынҡы мөйөшлө өсмөйөш

**ОСТРОУ́МИЕ** *с* тапҡырлыҡ, үткер аҡыллылыҡ

**ОСТРОУ́МНИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* үткер аҡыллы булып күренергә тырышыу, тапҡырлыҡ күрһәтергә маташыу

**ОСТРОУ́МНЫЙ,** -ая, -ое үткер аҡыллы, тапҡыр, йор, зирәк; **остроу́мный челове́к** зирәк кеше

**ОСТРОУ́ХИЙ,** -ая, -ое осло ҡолаҡлы

**О́СТРЫЙ,** -ая, -ое **1.** үткер, осло; **о́стрый нож** үткер бысаҡ; **о́стрые ка́мни** осло таштар **2.** осло, осло башлы; **о́стрый нос ло́дки** кәмәнең осло мороно **3.** *перен.* үткер, тапҡыр, зирәк; **о́стрый ум** зирәк аҡыл; **о́стрый взгляд** үткер ҡараш **4.** *перен.* зәһәрле, сәнскеле, әсе, үткер; **о́строе сло́во** үткер һүҙ; **о́стрый язы́к** әсе тел **5.** *перен.* әсе, ҡырҡыу, үтә, ныҡ, көслө; **о́стрый пе́рец** әсе борос **6.** *перен.* көслө, ҡаты, киçкен; **о́страя боль** ҡаты ауыртыу **7.** *перен.* киçкен, көсөргәнешле; **о́строе положе́ние** көсөргәнешле хәл ♦ **о́стрый у́гол** *мат.* ҡыçынҡы мөйөш; **о́стрый язы́к** *у кого*; **о́стрый (остёр) на язы́к** *кто* әсе телле, әрем телле

**ОСТРЯ́К** *м*; *разг.* үткер телле, тапҡыр (йор) һүҙле (кеше)

**ОСТУДИ́ТЬ** *сов. что* һыуытыу; **остуди́ть чай** сәйҙе һыуытыу

**ОСТУЖА́ТЬ** *несов. см.* **остуди́ть**

**ОСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **оступи́ться**

**ОСТУПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*неудачно ступить*) яҙа (яңылыш) баçыу **2.** *перен.*, *разг.* (*совершить ошибку*) яңылышыу, хата яһау

**ОСТЫВА́ТЬ** *несов. см.* **осты́ть**

**ОСТЫ́ТЬ** и **ОСТЫ́НУТЬ** *сов.* **1.** һыуыныу, һыуыу; **чай осты́л** сәй һыуынған **2.** *перен.* һыуыныу, һүрелеү, баçылыу; **чу́вства осты́ли** тойғолар һүрелде

**ОСТЬ** *ж* **1.** *бот.* ҡылсыҡ **2.** *собир.* (*в шерсти животного*) ҡыл, шырт

**ОСУДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого*; *юр.* ғәйепләү, ғәйепләп хөкөм итеү **2.** *кого-что* шелтәләү, яманлау, ғәйепләү; **осуди́ть дурно́й посту́пок** насар ҡылыҡты ғәйепләү **3.** *на что* и *с неопр.*; *перен.* (*обречь на что-л.*) дусар итеү

**ОСУЖДА́ТЬ** *несов. см.* **осуди́ть**

**ОСУЖДЕ́НИЕ** *с* **1.** *юр.* хөкөм итеү, ғәйепләү ҡарары сығарыу **2.** (*порицание*) шелтә, хурлыҡ мөһөрө баçыу, ғәйепләү

**ОСУЖДЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **осуди́ть 2.** *в знач. сущ.* **осуждённый** *м* и **осуждённая** *ж* хөкөм ителеүсе, хөкөм ителгән (кеше)

**ОСУ́НУТЬСЯ** *сов.* (бик ныҡ) ябығыу, һурылыу, тартылыу

**ОСУША́ТЬ** *несов. см.* **осуши́ть**

**ОСУШЕ́НИЕ** *с см.* **осуши́ть** 1 — **осуша́ть** 1; **осуше́ние боло́т** һаҙлыҡтарҙы киптереү

**ОСУШИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое киптереү ...ы, ҡоротоу ...ы; **осуши́тельные рабо́ты** киптереү эштәре

**ОСУШИ́ТЬ** *сов. что* **1.** киптереү, ҡоротоу; **осуши́ть боло́то** һаҙлыҡ киптереү **2.** (*выпить содержимое чего-л.*) эсеп бөтөрөү, бөткәнсе эсеү ♦ **осуши́ть глаза́** илауҙан туҡтау; **осуши́ть слёзы** *кому*, *чьи* йыуатыу

**ОСУ́ШКА** *ж см.* **осуши́ть** 1

**ОСУЩЕСТВИ́МОСТЬ** *ж* тормошҡа (ғәмәлгә, бойомға, эшкә) ашырырлыҡ булыу, үтәлерлек булыу

**ОСУЩЕСТВИ́МЫЙ,** -ая, -ое тормошҡа (ғәмәлгә, бойомға, эшкә) ашырырлыҡ, үтәлерлек; **осуществи́мое жела́ние** тормошҡа ашырырлыҡ теләк

**ОСУЩЕСТВИ́ТЬ** *сов. что* тормошҡа (бойомға) ашырыу, үтәү; **осуществи́ть культу́рную револю́цию** мәҙәни революцияны тормошҡа ашырыу

**ОСУЩЕСТВИ́ТЬСЯ** *сов.* тормошҡа (бойомға, ғәмәлгә, эшкә) ашыу, үтәлеү; **мечта́ осуществи́лась** хыял тормошҡа ашты

**ОСУЩЕСТВЛЕ́НИЕ** *с см.* **осуществи́ть** — **осуществля́ть**, **осуществи́ться**; **осуществле́ние генера́льного пла́на** генераль пландың тормошҡа ашырылыуы

**ОСУЩЕСТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **осуществи́ть**

**ОСУЩЕСТВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **осуществи́ться 2.** *страд. от* **осуществля́ть**

**ОСЦИЛЛОГРА́ММА** *ж*; *спец.* осциллограмма

**ОСЦИЛЛО́ГРАФ** *м*; *физ.* осциллограф (*техникала, медицинала һ.б. электрик процестарҙы күҙәтеү һәм яҙыу приборы*); **электромагни́тный осцилло́граф** электромагнитлы осциллограф

**ОСЧАСТЛИ́ВИТЬ** *сов. кого-что* бәхетле итеү

**ОСЧАСТЛИ́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **осчастли́вить**

**ОСЫ́ПАТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*посыпать со всех сторон чем-л.*) һибеү, һибеп сығыу **2.** *кого-что* (*сплошь покрыть*) күмеү, ҡаплау, һибелеү; **осы́пать украше́ния бриллиа́нтами** биҙәүестәргә гәүһәр (таштар) һибеү (һибеп эшләү); **не́бо осы́пано звёздами** күктә йондоҙҙар һибелгән **3.** *чем*; *перен.* күмеү, күмеп ташлау; **осы́пать пода́рками** бүләккә күмеү **4.** *что* ҡойоу; **дере́вья осы́пали свои́ ли́стья** ағастар япрағын ҡойҙо **5.** *что* (*развалить что-л. сыпучее*) таратыу; **осы́пать ку́чу песка́** ҡом өйөмөн таратыу

**ОСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **осы́пать**

**ОСЫ́ПАТЬСЯ** *сов.* **1.** (*обвалиться*) емерелеү, ишелеү, емерелеп (ишелеп) төшөү; **штукату́рка осы́палась** штукатурка емерелеп төштө **2.** (*опасть*) ҡойолоу, ҡубыу, ҡубып (ҡойолоп) төшөү; **лепестки́ осы́пались** таж япраҡтары

ҡойолдо **3.** (*усеяться множеством чего-л.*) ҡапланыу; **поля́на осы́палась цвета́ми** ялан сәскәләр менән ҡапланған

**ОСЫПА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **осы́паться** **2.** *страд. от* **осыпа́ть**

**О́СЫПЬ** *ж*; *геол.* ишелмә (*тау ҡоҡомдарынан ел, яуым-төшөм ашауҙан барлыҡҡа килгән өйөмдәр*)

**ОСЬ** *ж* **1.** (*стержень*) күсәр; **ось теле́ги** арба күсәре **2.** *спец.* (*прямая, проходящая через центр симметрии*) күсәр, үҙәк; **ось враще́ния** әйләнеү күсәре **3.** *чего, какая*; *перен.* үҙәк; **ось собы́тий** ваҡиғалар үҙәге

**ОСЬМИНО́Г** *м* һигеҙаяҡ

**ОСЬМУ́ШКА** *ж*; *уст.* әсмуха; **осьму́шка ча́ю** әсмуха сәй

**ОСЯЗА́ЕМОСТЬ** *ж* һиҙелеүсәнлек, тойоусанлыҡ, тойолоусанлыҡ

**ОСЯЗА́ЕМЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **осяза́ть** **2.** *прил.* һиҙелеп (тойолоп) торған, һиҙелерлек, тойолорлоҡ; **осяза́емые результа́ты** һиҙелерлек һөҙөмтәләр

**ОСЯЗА́НИЕ** *с* һиҙеү, тойоу; **о́рганы осяза́ния** һиҙеү ағзалары

**ОСЯЗА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*служащий для осязания*) һиҙә торған, һиҙеү ...ы, тойоу ...ы; **осяза́тельные волоски́** һиҙеү епсәләре **2.** *перен.* һиҙелерлек, күҙгә күренерлек; **осяза́тельные результа́ты** күҙгә күренерлек һөҙөмтәләр

**ОСЯЗА́ТЬ** *несов. кого-что* һиҙеү, тойоу

**ОТ** и **ОТО** *предлог с род. п.* **1.** (*при указании на исходную точку чего-л.*) -дан/-дән, -дан алып; **отойти́ от крыльца́** тупһанан китеү; **от го́рода до ста́нции** ҡаланан (алып) станцияға тиклем

**2.** (*при обозначении предмета, лица, от которого кто-что-л. отделяется*) -дан/-дән; **оторва́ть пу́говицу от пальто́** пальтонан төймәне өҙөп алыу; **уйти́ от семьи́** ғаиләнән китеү

**3.** (*при указании на источник чего-л.*) -дан/-дән; **насле́дство оста́лось от отца́** мираҫ атайҙан ҡалған

**4.** (*при указании повода, причины какого-л. действия, состояния*) -дан/-дән; **бле́дный от стра́ха** ҡурҡыуҙан ап-аҡ (*йөҙлө*)

**5.** (*при обозначении предмета, явления, которое устраняется*) -дан/-дән; **освободи́ться от оши́бок** хаталарҙан арыныу; **очи́стить от гря́зи** бысраҡтан таҙартыу

**6.** (*при указании на что-л. удаляемое, предотвращаемое*) -дан/-дән, -ға/-гә ҡаршы; **лека́рство от ка́шля** йүтәлгә ҡаршы дарыу

**7.** (*при указании на принадлежность какому-л. предмету*) ...ы; **футля́р от очко́в** күҙлек һауыты

**8.** (*при указании времени, датирующего что-л.*) -да/-дә яҙылған; **письмо́ от шесто́го** алтыһында яҙылған хат

**9.** (*при указании на временну́ю последовательность*) -дан/-дән, -ға/-гә; **год о́т году** йылдан-йыл ♦ **вре́мя от вре́мени** ваҡыт-ваҡыт, ваҡыты менән; **от ма́ла до вели́ка** йәше-ҡарты, һәммәһе; **от всей души́** ысын күңелдән; **от сло́ва до сло́ва**; **от сло́ва к сло́ву** һүҙҙән-һүҙгә, һүҙ эйәрә һүҙ

**ОТ...** (**ОТО...**, **ОТЪ...**) *приставка* **1.** *ҡылымдар яһап, түбәндәге мәғәнәләрҙе аңлата*: 1) *берәй нәмәнән* (*кемдән*) *алыҫлашыуҙы, ситләшеүҙе, мәҫ.*, **отбежа́ть** йүгереп китеү; **отгрести́** ишеп китеү; **отступи́ть** артҡа сигенеү; 2) *предметтан уның бер өлөшөн йәки икенсе предметты айырыуҙы, мәҫ.*, **отвинти́ть** бороп алыу; **отвяза́ть** сисеп алыу; **откуси́ть** тешләп алыу; **отре́зать** ҡырҡып алыу; 3) *бер нәмәгә яуап рәүешендәге хәрәкәтте, мәҫ.*, **отблагодари́ть** рәхмәт белдереү; 4) *хәрәкәттең тамам булыуын, мәҫ.*, **отбараба́нить** барабан ҡағып туҡтау; **отцвести́** сәскә ҡойоу; 5) *берәй нәмәнән ҡотолоуҙы, уны алып ташлауҙы, мәҫ.*, **откача́ть** һурҙырып сығарыу; **отучи́ть** биҙҙереү, ташлатыу; 6) "*-ся*" *ялғауы менән берәй нәмәнән баш тартыуҙы, мәҫ.*, **отговори́ться** һылтау табыу; 7) *эште, хәрәкәтте тыйыуҙы, һиҙеүҙе юғалтыуға тиклем алып барып еткереү, мәҫ.*, **отлежа́ть** яйһыҙ ятып (тәнде) ойотоу **2.** *сифат яһалышында ҡылланылып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән яһалғанын белдерә, мәҫ.*, **отглаго́льный** ҡылымдан яһалған

**ОТА́ВА** *ж*; *с.-х.* ҡурпы; **кле́верная ота́ва** клевер ҡурпыһы

**ОТА́ПЛИВАТЬ** *несов. см.* **отопи́ть**

**ОТА́ПЛИВАТЬСЯ** *несов.* яғылыу, яғып йылытылыу; **дом не ота́пливается** өй яғылмай

**ОТА́РА** *ж* һарыҡ көтөүе

**ОТБА́ВИТЬ** *сов. что, чего* кәметеү, аҙайтыу, бүҫкәртеү, кәмета (аҙайта) төшөү

**ОТБА́ВКА** *ж*; *разг. см.* **отба́вить** — **отбавля́ть**

**ОТБАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отба́вить** ♦ **хоть отбавля́й** кәрәгенән артыҡ, иҫәбе-хисабы юҡ

**ОТБАРАБА́НИВАТЬ** *несов. см.* **отбараба́нить**

**ОТБАРАБА́НИТЬ** *сов.* **1.** (*кончить барабанить*) барабан ҡағыуҙан туҡтау **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (ашыҡ-бошоҡ) уйнап алыу; **отбараба́нить вальс** ашыҡ-бошоҡ вальс уйнап алыу **3.** *перен.*, *разг.* ҡысҡырып, шәп (итеп) һөйләү (әйтеү); **отбараба́нить докла́д** докладты ҡысҡырып, шәп итеп һөйләп сығыу

**ОТБЕГА́ТЬ** *несов. см.* **отбежа́ть**

**ОТБЕЖА́ТЬ** *сов.* йүгереп (сабып) китеү

**ОТБЕ́ЛИВАНИЕ** *с см.* **отбе́ливать**; **отбе́ливание холста́** киндер ағартыу

**ОТБЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **отбели́ть**

**ОТБЕ́ЛИВАЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **отбе́ливать** **2.** *прил.* ағарта торған; **отбе́ливающий крем** ағарта торған крем

**ОТБЕЛИ́ТЬ** *сов. что* ағартыу, ағартып алыу, ағартып сығыу; **отбели́ть холст** киндер ағартыу

**ОТБЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ағартылыу, ағартылып бөтөү

**ОТБЕ́ЛКА** *ж см.* **отбели́ть** — **отбе́ливать**; **отбе́лка тка́ни** тауар ағартыу

**ОТБЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* ағартыу ...ы, ағартылған; **отбе́льное произво́дство** ағартыу производствоһы

**ОТБИВА́ТЬ** *несов. см.* **отби́ть** ♦ **отбива́ть шаг** шыҡ-шыҡ баҫып атлау

**ОТБИВА́НИЕ** *см.* **отбива́ть**

**ОТБИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отби́ться** **2.** *страд. от* **отбива́ть**

**ОТБИ́ВКА** *ж*; *см.* **отби́ть** 11 — **отбива́ть**

**ОТБИВНО́Й,** -ая, -ое **1.** тапау ...ы, сүкеү ...ы; **отбивно́й мо́лот** тапау сүкеше **2.** төйөлгән, тапалған (*тапап, йомшартып әҙерләнгән ит*); **отбивна́я котле́та** тапалған иттән котлет **3.** *в знач. сущ.* **отбивна́я** *ж* йомшартылған ит

**ОТБИРА́ТЬ** *несов. см.* **отобра́ть**

**ОТБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*ударом отколоть*) һындырып (ватып) төшөрөү; **отби́ть ру́чку у ча́йника** сәйгүндең тотҡаһын ватып төшөрөү **2.** *что* (*отбросить встречным ударом*) ҡаҡлыҡтырыу, кире ҡағыу, (кире) ҡаҡлыҡтыра һуғыу; **отби́ть мяч** тупты кире һуғыу **3.** *кого-что* (*заставить отступить, отразить*) кире ҡағыу; **отби́ть ата́ку** атаканы кире ҡағыу **4.** *кого-что* (*отнять с боем*) һуғышып кире алыу, ҡотҡарыу, азат итеү; **отби́ть го́род** ҡаланы һуғышып кире алыу **5.** *кого-что*; *разг.* (*отделить от общей массы*) айырыу, айырып алыу; **отби́ть жеребёнка от табуна́** ҡолондо өйөрҙән айырып алыу **6.** *кого*; *разг.* үҙенә ҡаратыу, тартып алыу; **отби́ть вы́годное де́ло** файҙалы эште тартып алыу; **отби́ть жениха́** кейәү егетен үҙенә ҡаратыу **7.** *что*; *разг.* (*запах, привкус*) бөтөрөү, баҫыу; **отби́ть у воды́ за́пах хло́ра** һыуҙағы хлор еҫен бөтөрөү **8.** *что*; *разг.* (*охоту, желание*) бөтөрөү, юҡ итеү, һүндереү, биҙҙереү; **отби́ть жела́ние** теләкте һүндереү **9.** *что* (*обозначить ударами, звоном*) һуғыу, көй сығарып һуғыу; **отби́ть такт** тактҡа һуғыу **10.** *что* (*повредить*) имгәтеү, һуғып ауырттырыу; **отби́ть ру́ку** ҡулды имгәтеү **11.** *что* тапау, сүкеү; **отби́ть косу́** салғы сүкеү **12.** *без доп.* һуғыу, һуғып туҡтау; **часы́ отби́ли** сәғәт һуғып туҡтаны

**ОТБИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** кителеп (ватылып, һынып) төшөү; **но́сик ча́йника отби́лся** сәйгүн мороно кителеп төшкән **2.** һөжүмде кире ҡағыу; **отби́ться от врага́** дошман һөжүмен кире ҡағыу **3.** айырылыу, айырылып ҡалыу; **ло́шадь отби́лась от табуна́** ат өйөрҙән айырылып ҡалған ♦ **отби́ться от до́ма** өйҙән биҙеү; **отби́ться от рук** буйһонмай (баш бирмәй) башлау, һыртлап китеү, ҡулдан ысҡыныу

**ОТБЛАГОДАРИ́ТЬ** *сов. кого-что, за что* рәхмәт әйтеү (белдереү), яҡшылыҡ менән яуап ҡайтарыу

**О́ТБЛЕСК** *м* сағылыш, шәүлә; **о́тблески пла́мени** ялҡын шәүләләре; **о́тблеск со́лнечных луче́й** ҡояш нурҙары сағылышы

**ОТБО́Й** *м* **1.** *см.* **отби́ть** 2, 3, 11; **2.** (*сигнал*) отбой ♦ **бить отбо́й** ҡайтауыллау, кире ҡайтыу, сигеү (*фекерҙән, ниәттән һ.б.*); **отбо́ю (отбо́я) нет** *от кого-чего* кәрәгенән тыш күп, артыҡ күп

**ОТБО́ЙКА** *ж*; *горн.* ватыу; **отбо́йка угля́** күмер ватыу

**ОТБО́ЙНЫЙ,** -ая, -ое вата торған, ватыу ...ы; **отбо́йный молото́к** вата торған сүкеш

**ОТБОМБИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* бомбаға тотоу

**ОТБОМБИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* бомбаға тотоуҙы тамамлау, бомбаларҙы ташлап бөтөрөү

**ОТБО́Р** *м см.* **отобра́ть** ♦ **есте́ственный отбо́р** тәбиғи һайланыш; **иску́сственный отбо́р** яһалма һайланыш (*тоҡомдо яҡшыртыу өсөн*)

**ОТБО́РНЫЙ,** -ая, -ое **1.** һайланма, һайлам, һайлап алынған, иң яҡшы; **отбо́рные семена́** һайлап алынған орлоҡтар **2.** *разг.* (*неприличный*) әшәке, оятһыҙ; **отбо́рные слова́** әшәке һүҙҙәр

**ОТБО́РОЧНЫЙ,** -ая, -ое һайлап алыу ...ы, һайлап ала торған, һайлап алыу өсөн үткәрелгән; **отбо́рочная коми́ссия** һайлап алыу комиссияһы; **отбо́рочные соревнова́ния** һайлап алыу ярыштары

**ОТБРА́СЫВАНИЕ** *с см.* **отбра́сывать**

**ОТБРА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **отбро́сить**

**ОТБРИВА́ТЬ** *несов. см.* **отбри́ть** 2

**ОТБРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* **1.** ҡырып бөтөү **2.** ҡырт киҫеү, ҡырҡа яуап биреү

**ОТБРО́СИТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* алып ташлау, ситкә ырғытыу; **отбро́сить оку́рок** тәмәке төпсөгөн ситкә ырғытыу **2.** *что* ситкә тартыу; **отбро́сить портье́ру** тәҙрә пәрҙәһен ситкә тартыу **3.** *перен.* (*отвергнуть*) кире ҡағыу, юл ҡуймау, алып ташлау; **отбро́сить сомне́ния** шикләнеүҙәргә юл ҡуймау **4.** *кого-что*; *перен.* (*заставить отступить*) сигенергә мәжбүр итеү, сигендереү, ҡыуып ебәреү; **отбро́сить проти́вника за ре́ку** дошманды йылға арьяғына сигендереү **5.** *перен.* (*свет, тень*) төшөрөү, таратыу; **отбро́сить тень** күләгә төшөрөү

**ОТБРО́СЫ** *мн.* (*ед.* **отбро́с** *м*) ташландыҡ, ҡалдыҡ-боҫтоҡ, сүп-сар ♦ **отбро́сы о́бщества** түбәнлеккә төшкән кешеләр

**ОТБУКСИ́РОВАТЬ** *сов. что* һөйрәтеп илтеп ҡуйыу, тарттырып сығарыу, буксирға алыу

**ОТБЫВА́НИЕ** *с см.* **отбы́ть** 2; **отбыва́ние наказа́ния** хөкөм ителеү срогын тултырыу, (төрмәлә) ултырып сығыу

**ОТБЫВА́ТЬ** *несов. см.* **отбы́ть**

**ОТБЫ́ТИЕ** *с см.* **отбы́ть**; **отбы́тие по́езда** поездың китеүе

**ОТБЫ́ТЬ** *сов.* **1.** (*уехать*) китеү, китеп барыу, сығып китеү, юлға сығыу; **отбы́ть из Уфы́** Өфөнән китеү **2.** *что* и *без доп.* үтәү, атҡарыу, тултырыу, тултырып сығыу; **отбы́ть срок слу́жбы** хеҙмәтте тултырыу

**ОТВА́ГА** *ж* батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, ғәйрәт, ғәййәрлек, ажар, ҡаһарманлыҡ

**ОТВА́ДИТЬ** *сов. кого-что, от чего*; *разг.* биҙҙереү, һыуындырыу, ташлатыу, һүрелдереү, һүрелтеү; **отва́дить от куре́ния** тәмәке тартыуҙы ташлатыу

**ОТВА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **отва́дить**

**ОТВА́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отва́житься**

**ОТВА́ЖИТЬСЯ** *сов. на что* и *с неопр.* баҙнат итеү, ҡыйыулыҡ (батырсылыҡ) итеү, тәүәккәллек итеү; **отва́житься спо́рить** бәхәсләшергә баҙнат итеү

**ОТВА́ЖНОСТЬ** *ж* батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек

**ОТВА́ЖНЫЙ,** -ая, -ое батыр, ҡыйыу, йөрәкле, тәүәккәл; **отва́жный челове́к** ҡыйыу кеше

**ОТВА́Л** *м* **1.** *см.* **отвали́ть** 1, 3; **2.** (*часть плуга*) кәҫтаҡта; **плуг с отва́лом** кәҫтаҡталы һабан **3.** (*пласт земли*) кәҫ **4.** (*насыпь*) өйөм ♦ **до отва́ла (отва́лу) (нае́сться, накорми́ть)** ғарҡ булғансы (ашау)

**ОТВА́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **отвали́ть**

**ОТВА́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отвали́ться** **2.** *страд. от* **отва́ливать**

**ОТВАЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* ауҙарыу, ситкә ауҙарып ташлау, ситкә этеп ҡуйыу; **отвали́ть ка́мень** таш ауҙарыу **2.** *что*; *прост.* (*расщедриться*) йомартланып күп биреү, йомартланып биреп ташлау, сығарып биреү **3.** *без доп.* (*отплыть*) ҡуҙғалып китеү (*суднолар тураһында*); **паро́м отвали́л от бе́рега** борам ярҙан ҡуҙғалып китте

**ОТВАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡубыу, ҡубып төшөү; **кора́ отвали́лась** ҡабыҡ ҡубып төшкән **2.** *прост.* (*насытившись, отодвинуться*) ашауҙан туҡтау, туйып ситкә китеү **3.** *разг.* (*откинуться*) (кәүҙәне, башты) артҡа ташлау

**ОТВАЛЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* баҫыу; **отваля́ть ва́ленки** бийма баҫыу **2.** *что*; *прост.* ашыҡ-бошоҡ эшләү, эшләп ташлау; **отваля́ть по́весть** повесть яҙып ташлау

**ОТВА́Р** *м* һурпа, һарҡынды, (бешкән) һыу; **мясно́й отва́р** ит һурпаһы; **ри́совый отва́р** дөгө бешкән һыу

**ОТВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **отвари́ть**

**ОТВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отвари́ться** **2.** *страд. от* **отва́ривать**

**ОТВАРИ́ТЬ** *сов. что* **1.** бешереү, бешереп алыу; **отвари́ть карто́фель** картуф бешереү **2.** *тех.* ҡыҙҙырып ҡуптарыу, айырып алыу

**ОТВАРИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бешеү, бешеп етеү **2.** *тех.* (утта) ҡыҙып, ҡубып төшөү

**ОТВАРНО́Й,** -ая, -ое **1.** бешкән, бешер(ел)гән; **отварно́е мя́со** бешкән ит **2.** *разг.* (*прокипячённый*) ҡайнаған, ҡайнатылған

**ОТВЕ́ДАТЬ** *сов. что, чего*; *разг.* **1.** (*попробовать*) тәмен татып (тәмләп, ашап) ҡарау, ауыҙ итеү **2.** (*испытать*) татыу, баштан кисереү

**ОТВЕ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **отве́дать** 1

**ОТВЕЗТИ́** *сов. кого-что* **1.** алып барыу, илтеү, илтеп ҡуйыу, илтеп биреү (*атта, машинала, поезда һ.б.*); **отвезти́ пи́сьма на по́чту** хаттарҙы почтаға алып барыу **2.** (*увезти в сторону*) ситкә алып китеү, ситкә илтеп ташлау

**ОТВЕРГА́ТЬ** *несов. см.* **отве́ргнуть**

**ОТВЕ́РГНУТЬ** *сов. кого-что* кире ҡағыу, ҡабул итмәү; **отве́ргнуть предложе́ние** тәҡдимде кире ҡағыу **2.** *кого* (*не ответить взаимностью*) тиң күрмәү, яратмау **3.** *кого* (*изгнать из своей среды*) ситкә ҡағыу (тибәреү), ситләтеү

**ОТВЕРДЕВА́ТЬ** *несов. см.* **отверде́ть**

**ОТВЕРДЕ́ЛОСТЬ** *ж* ҡатҡан урын (ер)

**ОТВЕРДЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое ҡатҡан, ҡатып ҡалған, ҡатыланған

**ОТВЕРДЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отверде́ть** **2.** *см.* **отверде́лость**

**ОТВЕРДЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡатыу, ҡатыланыу, ҡатып ҡалыу **2.** *лингв.* ҡатыланыу (*тартынҡы өндәр хаҡында*)

**ОТВЕ́РЖЕННОСТЬ** *ж*; *книжн.* ситләтелгәнлек, йәберһетелгәнлек

**ОТВЕ́РЖЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **отве́ргнуть** **2.** *прил.* ситләтелгән, ситкә ҡағылған, ҡағылып-һуғылған, йәберһетелгән **3.** *в знач. сущ.* **отве́рженный** *м* и **отве́рженная** *ж* ситләтелгән (йәберһетелгән) кеше

**ОТВЕРНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*отвинтить*) бороп алыу, бороп сығарыу; **отверну́ть га́йку** гайканы бороп алыу **2.** (*открыть*) бороп асыу; **отверну́ть кран** кранды бороп асыу **3.** *прост.* өҙөп (ҡайырып) алыу, ҡайырып өҙөү (сығарыу); **отверну́ть ку́кле ру́ки** ҡурсаҡтың ҡулын өҙөп алыу **4.** ҡайтарыу, ҡайтарып ҡуйыу; **отверну́ть полу́ пальто́** пальто сабыуын ҡайтарып ҡуйыу **5.** (*повернуть в сторону*) ситкә бороу; **отверну́ть лицо́** йөҙҙө ситкә бороу

**ОТВЕРНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*отвинтиться*) боролоп сығыу, бушау, ысҡынып китеү; **винт отверну́лся** винт бушаған **2.** асылыу, боролоп асылыу; **кран отверну́лся** кран асылған **3.** ҡайтарылыу, ҡайтарып ҡуйылыу; **рука́в ку́ртки отверну́лся** курткасодың еңе ҡайтарылды **4.** (*повернуться в сторону*) ситкә боролоу, боролоу **5.** *от кого-чего*; *перен.* ҡасыу, ситләшеү, ташлау; **нельзя́ отверну́ться от друзе́й** дуҫтарҙан ситләшергә ярамай

**ОТВЕ́РСТИЕ** *с* тишек, ек, ярыҡ; **отве́рстие ме́жду ра́мой и стёклами** ҡыҫа менән быяла араһындағы ярыҡ; **сквозно́е отве́рстие** үтәләй тишек

**ОТВЕРТЕ́ТЬ** *сов.*; *разг. см.* **отверну́ть** 1—3

**ОТВЕРТЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг. см.* **отверну́ться** 1, 2; **2.** *от чего*; *перен.* (*уклониться*) һылтаулап баш тартыу, хәйләләп ҡотолоу

**ОТВЁРТКА** *ж* отвёртка

**ОТВЁРТЫВАТЬ** *несов. см.* **отверну́ть**

**ОТВЁРТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отверну́ться** **2.** *страд. от* **отвёртывать**

**ОТВЕ́С** *м* **1.** *спец.* ауыртмаҡ (*вертикаль йүнәлеште билдәләү өсөн бау осона тағылған ауырлыҡ*) **2.** (*вертикальный склон*) ныҡ текә битләү, текәлек, текә ҡая

**ОТВЕ́СИТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*взвесить*) үлсәү, үлсәп биреү **2.** *что*; *прост.* (*дать, нанести удар*) һалып (һуғып) ебәреү, һуғыу, ҡундырыу ♦ **отве́сить покло́н** сәләмләп баш эйеү

**ОТВЕ́СНЫЙ,** -ая, -ое текә; **отве́сная скала́** текә ҡая

**ОТВЕСТИ́** *сов.* **1.** *кого-что* алып барыу, илтеп ҡуйыу (*етәкләп, эйәртеп*); **отвести́ ребёнка в де́тский сад** баланы балалар баҡсаһына алып барыу **2.** *кого-что* (*увести*) ситкә алып китеү; **отвести́ ста́до от доро́ги** көтөүҙе юлдан ситкә алып китеү **3.** *кого*; *перен.* (*отвлечь от чего-л.*) ситләштереү, биҙҙереү **4.** (*направить в сторону*) ситкә йүнәлдереү, ситкә (бороп) ебәреү; **отвести́ во́ду по тру́бам** һыуҙы торбаларға ебәреү **5.** *что*; *перен., разг.* алып ҡалыу, булдырмау, юл ҡуймау; **отвести́ беду́** бәләнән алып ҡалыу **6.** *кого-что*; *перен.* (*отклонить*) кире ҡағыу, ҡабул итмәү; **отвести́ заявле́ние** ғаризаны ҡабул итмәү; **отвести́ кандидату́ру** кандидатураны кире ҡағыу **7.** *что* (*предоставить*) бүлеп биреү; **отвести́ уча́сток под коллекти́вные сады́** коллектив баҡсалар өсөн ер бүлеп биреү ♦ **отвести́ глаза́** берәйһенең иғтибарын ситкә йүнәлтеү, алдау; **отвести́ ду́шу** күңелде бушатыу

**ОТВЕ́Т** *м*; *в разн. знач.* яуап; **положи́тельный отве́т** ыңғай яуап; **получи́ть пра́вильный отве́т** дөрөҫ яуап алыу; **призва́ть к отве́ту** яуапҡа тартыу ♦ **в отве́т** берәр нәмәгә яуап итеп; **(быть) в отве́те** яуаплы булыу; **ни отве́та ни приве́та** хәбәр-хәтер булмау

**ОТВЕТВИ́ТЬ** *сов. что* тармаҡландырыу, тармаҡтарға айырып ебәреү; **ответви́ть железнодоро́жные магистра́ли** тимер юл магистралдәрен тармаҡтарға айырып ебәреү

**ОТВЕТВИ́ТЬСЯ** *сов.* тармаҡланыу, айырылып сығыу

**ОТВЕТВЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **ответви́ть, ответви́ться** — **ответвля́ться** **2.** (*отросток*) ботаҡ, тармаҡ **3.** тармаҡ; **ответвле́ние кана́ла** канал тармағы

**ОТВЕТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **ответви́ть**

**ОТВЕТВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **ответви́ться** **2.** *страд. от* **ответвля́ть**

**ОТВЕ́ТИТЬ** *сов.* **1.** *что, на что, чем* и *без доп.* яуап биреү, яуап ҡайтарыу; **отве́тить на вопро́с** һорауға яуап биреү **2.** *за кого-что* (*понести наказание*) яуапҡа тарттырылыу, яза алыу, язаһын күреү

**ОТВЕ́ТНЫЙ,** -ая, -ое яуап ...ы; **отве́тное письмо́** яуап хаты

**ОТВЕ́ТСТВЕННОСТЬ** *ж* яуаплылыҡ; **нести́ отве́тственность** яуаплылыҡ тойоу; **привле́чь к отве́тственности** яуаплылыҡҡа тарттырыу

**ОТВЕ́ТСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** яуаплы; **отве́тственный реда́ктор** яуаплы мөхәррир; **отве́тственное отноше́ние к де́лу** эшкә яуаплы ҡараш **2.** (*значительный*) мөһим, әһәмиәтле; **отве́тственная рабо́та** мөһим эш

**ОТВЕ́ТЧИК** *м* и **ОТВЕ́ТЧИЦА** *ж* **1.** *юр.* яуап биреүсе, яуапҡа тарттырылыусы **2.** *разг.* (*несущий ответственность*) яуаплы кеше, яуап бирергә тейешле кеше

**ОТВЕЧА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отве́тить** **2.** *за кого-что* яуаплы булыу; **отвеча́ть за пору́ченное де́ло** тапшырылған эшкә яуаплы булыу **3.** *чему* (*соответствовать*) ярау, яуап биреү, тура килеү, ҡәнәғәтләндереү; **отвеча́ть интере́сам наро́да** халыҡ мәнфәғәттәрен ҡәнәғәтләндереү ♦ **отвеча́ть голово́й** баш менән яуап биреү

**ОТВЕ́ШИВАТЬ** *несов. см.* **отве́сить**

**ОТВИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **отвильну́ть**

**ОТВИЛЬНУ́ТЬ** *сов.*; *разг.* (хәйләләп) баш тартыу, ҡотолоу, тайпылыу; **отвильну́ть от отве́та** яуаптан ҡотолоу

**ОТВИНТИ́ТЬ** *сов. что* бороп алыу (сығарыу); **отвинти́ть га́йку** гайканы бороп алыу

**ОТВИНТИ́ТЬСЯ** *сов.* боролоп алыныу (сығыу)

**ОТВИ́НЧИВАТЬ** *несов. см.* **отвинти́ть**

**ОТВИ́НЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отвинти́ться** **2.** *страд. от* **отви́нчивать**

**ОТВИСА́ТЬ** *несов. см.* **отви́снуть**

**ОТВИСЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*об одежде*) эленеп (тороп) тигеҙләнеү (яҙылыу)

**ОТВИ́СЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* һалпы, һалбыр, һалынҡы, һалпыш; **отви́слые щёки** һалынҡы яңаҡтар; **отви́слые гу́бы** һалпыш ирендәр

**ОТВИ́СНУТЬ** *сов.* һалпайыу, һалбырау, һалыныу, һалынып төшөү (тороу); (*о губах*) шалпайыу

**ОТВЛЕКА́ТЬ** *несов. см.* **отвле́чь**

**ОТВЛЕКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отвле́чься** 1; **2.** *страд. от* **отвлека́ть**

**ОТВЛЕЧЕ́НИЕ** *с см.* **отвле́чь, отвле́чься**

**ОТВЛЕЧЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **отвле́чь** **2.** *прил.* ситләштерелгән, абстракт; **отвлечённое поня́тие** абстракт төшөнсә ♦ **отвлечённое и́мя существи́тельное** *грам.* абстракт исем; **отвлечённое число́** *мат.* исемһеҙ һан

**ОТВЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *кого-что* албырғатыу, (иғтибарын) ситкә йүнәлтеү (йүнәлдереү); **отвле́чь ого́нь на себя́** утты үҙеңә йүнәлдереү **2.** *кого* айырыу, бүлдереү; **отвле́чь от дел** эштән бүлдереү **3.** *кого-что* онотторoу, арындырыу; **отвле́чь от**



26 зак. 2.0084.05

**тяжёлых мы́слей** ауыр уйҙарҙан арындырыу **4.** *что, от чего*; *книжн.* (*абстрагировать*) абстрактлаштырыу, ситләштереү

**ОТВЛЕ́ЧЬСЯ** *сов.* **1.** (*переключить внимание на что-л. другое*) албырғау, ситкә китеү, (иғтибарҙы) ситкә йүнәлтеү; **отвле́чься от разгово́ра** һөйләшеүҙән ситкә китеү **2.** (*абстрагироваться*) абстрактлашыу, ситләштерелеү

**ОТВО́Д** *м* **1.** *см.* **отвести́** 2—7; **2.** (*заявление об отстранении*) кире ҡағыу, ҡаршы сығыу; **дать отво́д** кире ҡағыу ♦ **для отво́да глаз** күҙ буяу өсөн

**ОТВОДИ́ТЬ** *несов. см.* **отвести́**

**ОТВОДНО́Й** и **ОТВО́ДНЫЙ,** -ая, -ое ситкә ебәрә (сығара) торған; **отводно́й кана́л** ситкә ебәрә торған канал

**ОТВО́ДОК** *м*; *сад.* тамырланған ботаҡ (*ҡүсенте алыу өсөн*), үренде

**ОТВОЕВА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һуғышып кире алыу (ҡайтарыу); **отвоева́ть кре́пость у врага́** дошмандан ҡәлғәне һуғышып кире ҡайтарыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*добиться в результате борьбы, труда*) яулап алыу, яулау **3.** *без доп.*; *разг.* (*кончить воевать*) һуғышты бөтөрөү **4.** *без доп.*; *разг.* (*провоевать*) һуғышыу, һуғышта булыу, һуғышып үткәреү

**ОТВОЕВА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һуғышып туҡтау

**ОТВОЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **отвоева́ть**

**ОТВОЗИ́ТЬ** *несов. см.* **отвезти́**

**ОТВОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **отверну́ть**

**ОТВОРА́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отверну́ться 2.** *страд. от* **отвора́чивать**

**ОТВОРИ́ТЬ** *сов. что* асыу, асып ебәреү, асып ҡуйыу; **отвори́ть фо́рточку** форточканы асып ебәреү

**ОТВОРИ́ТЬСЯ** *сов.* асылыу, асылып китеү; **дверь отвори́лась** ишек асылып китте

**ОТВОРО́Т** *м* ҡайтарма; **жаке́т с отворо́тами** ҡайтарма яғалы жакет

**ОТВОРОТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* тәгәрәтеп алып ташлау (ситкә күсереү); **отвороти́ть ка́мень** ташты тәгәрәтеп ситкә күсереү

**ОТВОРЯ́ТЬ** *несов. см.* **отвори́ть**

**ОТВОРЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отвори́ться 2.** *страд. от* **отворя́ть**

**ОТВРАТИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** ерәнгес, әшәке, шаҡшы; **отврати́тельный за́пах** ерәнгес еҫ **2.** *разг.* бик насар (хөрт); **отврати́тельная пого́да** бик насар көн

**ОТВРАТИ́ТЬ** *сов. что*; *книжн.* (*предотвратить*) булдырмау, булдырмай ҡалыу; **отврати́ть неприя́тность** күңелһеҙ хәлде булдырмау

**ОТВРАЩА́ТЬ** *несов. см.* **отврати́ть**

**ОТВРАЩЕ́НИЕ** и **ОТВРАЩЕ́НЬЕ** *с* ерәнеү, ерәнес; **чу́вство отвраще́ния** ерәнеү тойғоһо

**ОТВЫКА́ТЬ** *несов. см.* **отвы́кнуть**

**ОТВЫ́КНУТЬ** *сов.* **1.** *от чего* и *с неопр.* биҙеү, ташлау, күңел ҡайтыу; **отвы́кнуть от куре́ния** тәмәке тартыуҙы ташлау **2.** *от кого-чего* төңөлөү, һыуыныу; **ребёнок отвы́к от роди́телей** бала ата-әсәһенән һыуынған

**ОТВЯЗА́ТЬ** *сов. кого-что* сисеү, (бәйҙән) ысҡындырыу, сисеп алыу, сисеп (ысҡындырып) ебәреү; **отвяза́ть соба́ку** этте бәйҙән ысҡындырып ебәреү

**ОТВЯЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сиселеү, ысҡыныу; **верёвка отвяза́лась** бау сиселгән; **ло́шадь отвяза́лась** ат бәйҙән ысҡынған **2.** *от кого-чего*; *перен., разг.* (*избавиться*) ҡотолоу; **отвяза́ться от дурны́х мы́слей** насар уйҙарҙан ҡотолоу **3.** *перен., разг.* (*перестать надоедать*) бәйләнеүҙән туҡтау, тыныслыҡта ҡалдырыу

**ОТВЯ́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **отвяза́ть**

**ОТВЯ́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отвяза́ться 2.** *страд. от* **отвяза́ть**

**ОТГАДА́ТЬ** *сов. что* и *без доп.* яуап табыу, белеү, аңлау, белеп (аңлап) алыу; **отгада́ть зага́дку** йомаҡҡа яуап табыу; **отгада́ть наме́рения** ниәттәрҙе аңлап алыу

**ОТГА́ДКА** *ж* **1.** *см.* **отгада́ть 2.** йомаҡ яуабы

**ОТГА́ДЧИК** *м*; *разг.* уйҙы асыусы, йомаҡ табыусы

**ОТГА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **отгада́ть**

**ОТГИБА́ТЬ** *несов. см.* **отогну́ть**

**ОТГИБА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отогну́ться 2.** *страд. от* **отгиба́ть**

**ОТГЛАГО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *грам.* ҡылымдан яһалған; **отглаго́льное и́мя существи́тельное** ҡылымдан яһалған исем

**ОТГЛА́ДИТЬ** *сов. что* яҡшы итеп үтекләү, үтекләп алыу (сығыу); **отгла́дить брю́ки** салбарҙы үтекләп алыу

**ОТГЛА́ДИТЬСЯ** *сов.* үтекләнеү

**ОТГЛА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **отгла́дить**

**ОТГЛА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отгла́диться 2.** *страд. от* **отгла́живать**

**ОТГНИВА́ТЬ** *несов. см.* **отгни́ть**

**ОТГНИ́ТЬ** *сов.* сереп төшөү; **углы́ до́ма отгни́ли** өйҙөң мөйөштәре сереп төштө

**ОТГОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **отговори́ть**

**ОТГОВА́РИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отговори́ться 2.** *страд. от* **отгова́ривать**

**ОТГОВОРИ́ТЬ** *сов. кого, от чего* и *с неопр.* (уй-ниәттән) өгөтләп тыйыу (туҡтатыу), дүндереү, кире уйлатыу; **отговори́ть от пое́здки** барыуҙан дүндереү

**ОТГОВОРИ́ТЬСЯ** *сов. чем* һылтау табыу, һылтау менән ҡотолоу, (нимәгәлер) һылтанып баш тартыу; **отговори́ться боле́знью** ауырыуға һылтанып, баш тартыу

**ОТГОВО́РКА** *ж* һылтау, юҡ сәбәп; **неубеди́тельная отгово́рка** нигеҙһеҙ һылтау

**ОТГОЛО́СОК** *м* **1.** (*эхо, отзвук*) шаңдау, яңғырау; **отголо́ски вы́стрелов** атыу тауышының шаңдауҙары **2.** *перен.* (*отклик*) теләктәшлек

тойғоһо **3.** *перен.* (*следствие чего-л.*) эҙ, эҙемтә; **отголо́ски цикло́на** циклон эҙемтәләре

**ОТГО́Н** *м* **1.** *см.* **отогна́ть** 2, 4; **отго́н скота́** мал ҡыуыу; **отго́н ма́сел из не́фти** нефттән май ҡыуыу **2.** *с.-х.* (*пребывание на пастбищах — о скоте*) көтөүҙә булыу (йөрөү) **3.** (*продукт отгонки*) ҡыуылған (ҡыуып алынған) продукт

**ОТГО́НКА** *ж*; *спец. см.* **отогна́ть** 4

**ОТГО́ННЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* ҡыуғын ...ы; **отго́нное животново́дство** ҡыуғын малсылығы; **отго́нное па́стбище** ҡыуғын көтөүлеге

**ОТГОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **отогна́ть**

**ОТГОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **отгороди́ть**

**ОТГОРА́ЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отгороди́ться** **2.** *страд. от* **отгора́живать**

**ОТГОРА́ТЬ** *несов. см.* **отгоре́ть**

**ОТГОРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*перестать гореть*) һүнеү, яныуҙан туҡтау **2.** (*перегорев, отвалиться*) янып төшөү

**ОТГОРОДИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** бүлеү, ышыҡлау, сик ҡуйыу (*кәртә, ҡойма, шаршау һ.б. менән*) **2.** *перен.* (*обособить*) айырыу

**ОТГОРОДИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бүленеү, ышыҡланыу, сикләнеү; **отгороди́ться ши́рмой** шаршау менән ышыҡланыу **2.** *перен.* (*изолироваться*) ситләшеү, айырылыу; **отгороди́ться от людє́й** кешеләрҙән ситләшеү

**ОГРАНИЧЕ́НИЕ** *с см.* **ограни́чить**

**ОГРАНИ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **ограни́чить**

**ОГРАНИ́ЧИТЬ** *сов. что* сик ҡуйыу, сик һыҙыу, айырыу, бүлеү

**ОТГРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **отгрести́**

**ОТГРЕМЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*перестать греметь*) күкрәп туҡтау; **отгреме́л гром** күк күкрәп туҡтаны **2.** *перен.* туҡтау, бөтөү; **отгреме́ли бои́** һуғыштар бөттө

**ОТГРЕСТИ́** *сов.* **1.** *что* көрәү, көрәп ташлау, тырмау, тырмап алып ташлау, **отгрести́ снег** ҡарҙы көрәп ташлау **2.** (*отплыть*) ишеп (ҡуҙғалып) китеү; **отгрести́ от бе́рега** ишеп ярҙан ҡуҙғалып китеү

**ОТГРО́ХАТЬ** *сов.* **1.** *разг.* гөрһөлдәп туҡтау, гөрһөлдәмәй башлау; **пу́шки отгро́хали** пушкалар гөрһөлдәп туҡтаны **2.** *что*; *прост.* төҙөү, тиҙ генә һалыу, шаулатып (шәп итеп) үткәреү; **отгро́хал дом** тиҙ генә өй һалыу; **отгро́хать сва́дьбу** шаулатып туй үткәреү

**ОТГРУЖА́ТЬ** *несов. см.* **отгрузи́ть**

**ОТГРУЗИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*снять часть груза*) йөктө кәметеү (бер аҙ бушатыу) **2.** (*погрузить*) тейәп ебәреү; **отгрузи́ть у́голь** күмер тейәп ебәреү

**ОТГРУ́ЗКА** *ж см.* **отгрузи́ть** — **отгружа́ть**

**ОТГРЫЗА́ТЬ** *несов. см.* **отгры́зть**

**ОТГРЫ́ЗТЬ** *сов. что* сәйнәп өҙөү (өҙөп алыу), тешләп (кимереп) сығарыу, умырып алыу

**ОТГУ́Л** *м* отгул, өҫтәмә ял (*эш ваҡытынан тыш эшләгән өсөн бирелгән көн*)

**ОТГУ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **отгуля́ть** 1

**ОТГУЛЯ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* ял итеү; **отгуля́ть о́тпуск** отпускыны ял итеп үткәреү; **отгуля́ть за дежу́рство** дежурлыҡ өсөн өҫтәмә ял итеү **2.** *что*; *прост.* (*отпраздновать*) байрам итеү, уҙғарыу; **отгуля́ть сва́дьбу** туй уҙғарыу **3.** (*кончить гулять*) күңел асыуҙан туҡтау

**ОТДАВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отда́ть** **2.** *чем*; *разг.* еҫ килеү, аңҡыу, тәм килеү; **бо́чка отдаёт ры́бой** мискәнән балыҡ еҫе килә **3.** (*иметь отпечаток, налёт чего-л.*) сағылыу, белдереп (һиҙҙереп) тороу; **отдаёт старино́й** боронғолоҡ сағыла

**ОТДАВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отда́ться** **2.** *страд. от* **отдава́ть**

**ОТДАВИ́ТЬ** *сов. что* баҫып (ҡыҫып) имгәтеү, ауырттырыу; **отдави́ть но́гу** аяғына баҫып ауырттырыу

**ОТДА́ВЛИВАТЬ** *несов. см.* **отдави́ть**

**ОТДА́ИВАТЬ** *несов. см.* **отдои́ть**

**ОТДАЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отдали́ть** — **отдаля́ть, отдали́ться** **2.** (*даль*) алыҫлыҡ, йыраҡлыҡ, алыҫ ара ♦ **в отдале́нии (отдале́нье)**; **на отдале́нии** алыҫта

**ОТДАЛЁННОСТЬ** *ж* алыҫлыҡ, йыраҡлыҡ; **отдалённость от це́нтра** үҙәктән алыҫлыҡ

**ОТДАЛЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **отдали́ть** **2.** *прил.* алыҫ, йыраҡ, алыҫтағы, йыраҡтағы; **отдалённые райо́ны** алыҫ районлар **3.** *прил.* бик күп ваҡыттар элек, элекке замандарҙа; **в отдалённые времена́** элекке (үткән) замандарҙа **4.** *прил.* (*не имеющий прямой связи*) (туранан-тура) ҡағылышы булмаған, ситләшкән, алыҫ; **не име́ть отдалённого отноше́ния** туранан-тура ҡағылышы булмау; **отдалённое родство́** алыҫ туғанлыҡ **5.** *прил.* (*безразличный*) һалҡын; **отдалённый взгляд** һалҡын ҡараш

**ОТДАЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** *от кого-чего* алыҫайтыу, алыҫлаштырыу, йыраҡлаштырыу, йырағайтыу; **отдали́ть предме́т от фотоаппара́та** предметты фотоаппараттан йырағайтыу **2.** кисектереү, һуңғараҡ күсереү; **отдали́ть встре́чу** осрашыуҙың ваҡытын кисектереү **3.** ситләштереү; **отдали́ть родны́х друг от дру́га** туғандарҙы бер-береһенән ситләштереү

**ОТДАЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от кого-чего* алыҫайыу, алыҫлашыу, йыраҡлашыу, йырағайыу; **ло́дка отдали́лась от бе́рега** кәмә ярҙан алыҫлашты **2.** *от чего*; *перен.* ситкә китеү, ситләшеү; **отдали́ться от те́мы** теманан ситкә китеү **3.** *от кого* ситләшеү; **отдали́ться от соку́рсников** курсташтарҙан ситләшеү

**ОТДАЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отдали́ть**

**ОТДАЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отдали́ться** **2.** *страд. от* **отдаля́ть**

**ОТДА́РИВАТЬ** *несов. см.* **отдари́ть**

**ОТДАРИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* бүләккә ҡаршы бүләк биреү, яуап итеп бүләк биреү

**ОТДА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡайтарыу, кире (ҡайтарып) биреү; **отда́ть кни́ги в библиоте́ку** китаптарҙы китапханаға ҡайтарып биреү (тапшырыу); **отда́ть долг** бурысты ҡайтарыу **2.** *кого-что* биреү, тапшырыу; **отда́ть визи́тную ка́рточку** визит карточкаһын тапшырыу; **отда́ть зе́млю в аре́нду** ерҙе ҡуртымға биреү **3.** *перен.* сарыф итеү, тотоноу, биреү, бағышлау; **отда́ть си́лы на воспита́ние дете́й** көстө балалар тәрбиәләүгә бағышлау **4.** *что, кому* биреү, ҡалдырыу; **отда́ть го́род неприя́телю** ҡаланы дошманға ҡалдырыу **5.** *кого, кому, за кого* (*выдать замуж*) кейәүгә биреү **6.** *кого-что*; *разг.* (*продать*) биреү, һатыу, һатып ебәреү; **отда́ть това́р дёшево** тауарҙы арзанға һатыу **7.** *что* биреү; **отда́ть прика́з** бойороҡ биреү **8.** *без доп.* (*об оружии*) һуғыу, тибеү, бәреү, ҡаҡлыҡтырыу; **ружьё о́тдало в плечо́** мылтыҡ иңбашҡа һуҡты **9.** *без доп. безл.* (*отозваться болью*) ауыртыу, бәреү, ауыртып китеү; **о́тдало в спи́ну** арҡа ауыртып китте; **о́тдало в го́лову** ауыртыу башҡа бәрҙе **10.** *что*; *мор.* (*отвязать*) сисеү, сисеп ебәреү, ысҡындырыу, төшөрөү, һалыу, ташлау; **отда́ть концы́** бауҙы сисеү (*теплоход бәйләгән бауҙы*); **отда́ть я́корь** якорь ташлау **11.** *без доп.*; *прост.* ситкә китеү, артҡа (сиктереү) сигеү; **отда́ть маши́ну наза́д** машинаны артҡа сиктереү ♦ **отда́ть до́лжное** *кому-чему* баһалап еткереү; **отда́ть после́дний долг** һуңғы мәртәбә хушлашыу (*ерләүҙә ҡатнашыу*); **отда́ть бо́гу ду́шу** *уст.* үлеү, гүр эйәһе булыу; **отда́ть под суд** *кого* судҡа биреү

**ОТДА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *кому-чему, на что* биреләү, буйһоноу; **отда́ться в распоряже́ние** *чьё-л.* *кемдеңдер* бойороғона буйһоноу; **отда́ться воспомина́ниям** иҫтәлектәргә биреләү **2.** *кому-чему* (*посвятить себя*) биреләү, бағышлау; **отда́ться обще́ственной жи́зни** йәмәғәт эшенә биреләү **3.** *кому* (*о женщине*) биреләү, енси мөнәсәбәткә инеү **4.** (*о звуке*) яңғырау, яңғырап китеү, ишетелеү; **го́лос отда́лся в глухо́м лесу́** тын урманда тауыш яңғырап китте **5.** *в ком-чём* (*вызвать какое-л. ответное чувство*) сағылыу, сағылыш табыу

**ОТДА́ЧА** *ж* **1.** *см.* **отда́ть** 1—9; **2.** *спорт.* (*ответный удар*) кире һуғыу (бәреү) **3.** *воен.* (*при выстреле*) тибеү, бәреү, ҡаҡлығыу **4.** *уст.* (*коэффициент полезного действия*) файҙалы эш коэффициенты **5.** *перен.* (яҡшы, ҙур) һөҙөмтәләр, һөҙөмтәле; **рабо́тать с по́лной отда́чей** ҙур һөҙөмтәләр менән эшләү, яҡшы (һөҙөмтәле) эшләү

**ОТДВИЖНО́Й,** -ая, -ое шыуҙырма, шыуҙырмалы; **отдвижно́й засо́в** шыуҙырмалы бик

**ОТДЕЖУ́РИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*промежуток времени*) дежурҙа булыу (тороу), дежур итеү; **отдежу́рить ночь** төндә дежурҙа булыу **2.** (*окончить дежурство*) дежур итеп бөтөү, дежурлыҡты тамамлау

**ОТДЕ́Л** *м*; *в разн. знач.* бүлек; **отде́л сати́ры и ю́мора** сатира һәм юмор бүлеге; **отде́л снабже́ния** тәьмин итеү бүлеге; **отде́л ка́дров** кадрҙар бүлеге

**ОТДЕ́ЛАТЬ** *сов.* **1.** *что* (*придать законченный вид*) эшен бөтөрөү (теүәлләү), еренә еткереү; **отде́лать по́весть** повестың эшен бөтөрөү **2.** *что* (*подновить, ремонтируя*) яңыртыу, ремонтлау; **отде́лать дом** өйҙө яңыртыу **3.** *что, чем* (*украсить*) матурлау, биҙәкләү; **отде́лать пла́тье кружева́ми** күлдәкте селтәр менән биҙәкләү **4.** *что*; *прост.* (*испачкать, испортить*) бысратыу, боҙоу, эштән сығарыу **5.** *кого*; *прост.* (*выругать, избить*) әрләү, туҡмау, кәрәген биреү

**ОТДЕ́ЛАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** *от кого-чего* ҡотолоу; **отде́латься от заня́тий** дәрестәрҙән ҡотолоу **2.** *чем* сикләнеү; **отде́латься обеща́нием** вәғәҙә менән сикләнеү **3.** *чем* ҡотолоу; **дёшево отде́латься** еңел ҡотолоу

**ОТДЕЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отдели́ть, отдели́ться — отделя́ться** **2.** *обычно мн.* **отделе́ния** бүлендек; **гно́йные отделе́ния** эренле бүлендек **3.** (*обособленная часть помещения, вместилища*) бүлмә, бүлкәт; **отделе́ние ваго́на** вагондың бүлмәһе; **отделе́ния я́щика** йәшниктең бүлкәттәре **4.** (*часть учреждения*) бүлек, бүлексә; **хирурги́ческое отделе́ние больни́цы** хәстәхананың хирургия бүлеге; **отделе́ние совхо́за** совхоздың бүлексәһе **5.** (*часть концерта, вечера*) бүлек **6.** *воен.* (*воинское подразделение*) бүлек, отделение; **стрелко́вое отделе́ние** уҡсылар отделениеһы; **команди́р отделе́ния** бүлек командиры

**ОТДЕЛИ́МЫЙ,** -ая, -ое бүленмәле, бүленә торған

**ОТДЕЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое бүлеү ...ы, бүлә торған; **отдели́тельная ли́ния** бүлеү һыҙығы

**ОТДЕЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* айырыу, бүлеү, айырып (бүлеп, һыҙырып) алыу; **отдели́ть кору́ от ствола́** ағас ҡайырыһын олононан айырып алыу **2.** *что* (*распознать, отличить*) айырыу, айыра белеү, таныу, таный белеү; **отдели́ть пра́вду от лжи** дөрөҫлөктө ялғандан айыра белеү **3.** *кого-что* (*отграничить, обособить*) айырыу, бүлеү, айырып (бүлеп) ҡуйыу, сикләү, уратыу; **отдели́ть сад забо́ром** баҡсаны ҡойма менән уратыу **4.** *что* (*выделить*) бүлеү, бүлеп биреү; **отдели́ть садо́вый уча́сток** баҡса участкаһы бүлеп биреү **5.** *кого*; *уст.* башҡа сығарыу; **отдели́ть сы́на** улды башҡа сығарыу

**ОТДЕЛИ́ТЬСЯ** *сов. от кого-чего* **1.** айырылыу, айырылып сығыу, бүленеү, аҡтарылыу, аҡтарылып сығыу, ҡубыу, ҡубып сығыу; **кора́ отдели́лась от ствола́** ҡабыҡ олондан ҡупҡан; **отдели́ться от толпы́** халыҡ төркөмөнән айырылып сығыу **2.** *уст.* (*обособиться*) айырылыу, бүленеү, башҡа сығыу

**ОТДЕ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **отде́лать** 1—3, **отде́лывать** **2.** (*то, что служит украшением*) биҙәү,

биҙәк; **бро́шка с золото́й отде́лкой** алтын биҙәүле брошка

**ОТДЕ́ЛОЧНЫЙ,** -ая, -ое эшкәртеү ...ы, биҙәкләү ...ы; **отде́лочные рабо́ты** биҙәкләү эштәре; **отде́лочный цех** эшкәртеү цехы

**ОТДЕ́ЛЫВАТЬ** *несов. см.* **отде́лать**

**ОТДЕ́ЛЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отде́латься 2.** *страд. от* **отде́лывать**

**ОТДЕ́ЛЬНО** *нареч.* башҡа, айырым; **он живёт отде́льно от родны́х** ул туғандарынан айырым йәшәй

**ОТДЕ́ЛЬНОСТЬ: в отде́льности**; **по отде́льности** айырым, айырым рәүештә

**ОТДЕ́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** айырым, үҙенә башҡа; **отде́льная кварти́ра** айырым фатир **2.** ҡайһы бер, айырым; **отде́льные ли́ца** ҡайһы бер кешеләр

**ОТДЕЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отдели́ть 2.** *что, от чего* (*служить границей*) айырып (бүлеп) тороу, сикләү; **река́ отделя́ет по́ле от дере́вни** йылға баҫыуҙы ауылдан айырып тора

**ОТДЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отдели́ться 2.** *страд. от* **отделя́ть**

**ОТДЁРГИВАТЬ** *несов. см.* **отдёрнуть**

**ОТДЁРНУТЬ** *сов. что* тартыу, тартып алыу (асыу); **отдёрнуть занаве́ску** пәрҙәне тартып асыу; **отдёрнуть ру́ку** ҡулды тартып алыу

**ОТДИРА́ТЬ** *несов. см.* **отодра́ть** 1

**ОТДИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отодра́ться 2.** *страд. от* **отдира́ть**

**ОТДОИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого* и *без доп.* (*кончить доить*) һауып бөтөрөү **2.** *что, чего* (*подоить немного*) һауып алыу, бер аҙ һауып алыу; **отдои́ть стака́н молока́** бер стакан һөт һауып алыу

**ОТДОХНУ́ТЬ** *сов.* ял итеү, ял итеп алыу; **сесть отдохну́ть** ял итергә ултырыу ♦ **отдохну́ть душо́й (се́рдцем)** күңел (йән) тыныслығы табыу

**ОТДУБА́СИТЬ** *сов. кого*; *прост.* дөмбәҫләү, дөмбәҫләп ташлау

**ОТДУВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** (*тяжело дышать*) ауыр һулыш алыу, ауыр һулау **2.** *прост.* (*нести всю ответственность*) яуап биреү, ауырлығын күтәреү

**ОТДУ́ШИНА** *ж* **1.** еллек, төнлөк, төтөн юллығы; **отду́шина в пе́чи** мейес төнлөгө **2.** *перен.* йыуаныс, йыуаныу; **найти́ себе́ отду́шину** үҙеңә йыуаныс табыу

**О́ТДЫХ** *м* ял; **ле́тний о́тдых** йәйге ял; **дом о́тдыха** ял йорто ♦ **без о́тдыха** туҡтауһыҙ, ялһыҙ; **ни о́тдыху, ни сро́ку не дава́ть** *кому* тынғылыҡ бирмәү

**ОТДЫХА́ТЬ** *несов. см.* **отдохну́ть**

**ОТДЫХА́ЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **отдыха́ть 2.** *в знач. сущ.* **отдыха́ющий** *м* и **отдыха́ющая** *ж* ял итеүсе

**ОТДЫША́ТЬСЯ** *сов.* **1.** бер аҙ тын алыу, (*арығандан һуң*) тигеҙ һулай башлау; **отдыша́ться по́сле бе́га** йүгергәндән һуң тигеҙ һулай башлау **2.** *перен., прост.* ауырыуҙан арыныу, шәбәйеү

**ОТЁК** *м* шеш, шешенеү, елһенеү; **отёк ног** аяҡтар шешенеү

**ОТЕКА́ТЬ** *несов. см.* **оте́чь**

**ОТЁЛ** *м* быҙаулау

**ОТЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* быҙаулау

**ОТЕ́ЛЬ** *м* отель, ҡунаҡхана

**ОТЕПЛИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йылыта торған, йылытыу ...ы; **отепли́тельные прибо́ры** йылытыу приборҙары

**ОТЕПЛИ́ТЬ** *сов. что* йылытыу; **отепли́ть зда́ние** бинаны йылытыу

**ОТЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отепли́ть**

**ОТЕРЕ́ТЬ** *сов. что* һөртөү, һөртөп алыу; **отере́ть слёзы** күҙ йәштәрен һөртөү

**ОТЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* һөртөнөү

**ОТЕСА́ТЬ** *сов. см.* **обтеса́ть**

**ОТЁСЫВАТЬ** *несов. см.* **отеса́ть**

**ОТЕ́Ц** *м* **1.** ата, атай **2.** *мн.* **отцы́** (*предки*) ата-бабалар **3.** *книжн.* (*основоположник*) ата, нигеҙ һалыусы **4.** *разг.* (*обращение*) бабай

**ОТЕ́ЧЕСКИЙ,** -ая, -ое атайҙарса; **оте́ческая забо́та** атайҙарса хәстәрлек

**ОТЕ́ЧЕСТВЕННЫЙ,** -ая, -ое ватан ...ы, тыуған ил ...ы, илдә етештерелгән; **оте́чественные това́ры** тыуған ил тауарҙары ♦ **оте́чественная война́** ватан һуғышы; **Вели́кая Оте́чественная война́** Бөйөк Ватан һуғышы

**ОТЕ́ЧЕСТВО** *с*; *высок.* Ватан, Тыуған ил

**ОТЁЧНЫЙ,** -ая, -ое шешенгән, елһенгән; **отёчное лицо́** елһенгән йөҙ

**ОТЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** шешеү, шешенеү, елһенеү; **но́ги отекли́** аяҡтар шешенде **2.** (*о свече*) ireп ағып төшөү

**ОТЖА́ТЬ I** *сов.* **1.** *что* һығыу, һығып сығарыу (бөтөрөү); **отжа́ть сок из морко́ви** кишерҙең һутын һығып сығарыу; **отжа́ть бельё** кер һығыу **2.** *кого-что*; *разг.* (*оттеснить*) сигенергә мәжбүр итеү, ҡыҫырыҡлау, ҡыҫырыҡлап сығарыу **3.** *что*; *спец.* этәреп сығарыу; **отжа́ть кла́пан во́здухом** клапанды һауа менән этәреп сығарыу

**ОТЖА́ТЬ II** *сов. что* (*закончить жатву*) урып бөтөрөү (бөтөү), ураҡты тамамлау; **отжа́ть рожь** арышты урып бөтөрөү

**ОТЖЕ́ЧЬ** *сов. что*; *тех.* (*произвести отжиг*) яндырыу, яндырып сыныҡтырыу; **отже́чь сталь** ҡоросто яндырып сыныҡтырыу

**ОТЖИВА́ТЬ** *несов. см.* **отжи́ть**

**ОТЖИ́ВШИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **отжи́ть 2.** *прил.* йәшен йәшәгән; **отжи́вший стари́к** йәшен йәшәгән ҡарт **3.** *прил.*; *перен.* (*охладевший*) һыуынған, тойғоларын юғалтҡан; **отжи́вшее се́рдце** тойғоларын юғалтҡан йөрәк **4.** *прил.* (*устарелый*) иҫкергән, иҫке; **отжи́вшие взгля́ды** иҫкергән ҡараштар

**О́ТЖИГ** *м*; *тех.* ҡыҙҙырыу, яндырыу; **о́тжиг ста́ли** ҡоросто яндырыу

**ОТЖИГА́ТЬ** *несов. см.* **отже́чь**

**О́ТЖИМ** *м см.* **отжима́ть**

**ОТЖИМА́ТЬ** *несов. см.* **отжа́ть** I 1, 3

**ОТЖИ́МКА** *ж см.* **отжа́ть** I 1, 3; **отжи́мка со́ка** һут һығыу

**ОТЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* үҙ ғүмерен йәшәү, көнө бөтөү; **отжи́ть свой век** үҙ ғүмерен йәшәү **2.** *перен.* юғалыу, юҡҡа сығыу; **все чу́вства отжи́ли** бөтә тойғолар юҡҡа сыҡты **3.** (*устареть*) иҫкереү, ҡулланыуҙан сығыу; **э́тот обы́чай о́тжил** был йола иҫкергән

**ОТЗВА́НИВАТЬ** *несов. см.* **отзвони́ть**

**ОТЗВЕНЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*прозвенеть*) шылтырау; **колоко́льчик отзвене́л** ҡыңғырау шылтыраны **2.** (*перестать звенеть*) шылтырап туҡтау (тыныу)

**ОТЗВОНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*прозвонить*) шылтырау, һуғыу **2.** (*перестать звонить*) шылтырап (һуғып) туҡтау

**О́ТЗВУК** *м* **1.** (*эхо*) шаңдау, яңғыраҡ, ҡайтауаз **2.** *чего* (*звук, доносящийся издалека*) яңғырау, тауыш; **о́тзвуки взры́вов** шартлауҙар яңғырауы **3.** *перен.* (*ответное чувство*) яуап тойғоһо, теләктәшлек **4.** *чего*; *перен.* тәьҫир, эҙ, сағылыш, ҡалдыҡ; **о́тзвуки стари́нных леге́нд** боронғо риүәйәттәр сағылышы

**ОТЗВУЧА́ТЬ** *сов.* яңғырап туҡтау, тыныу, тынып ҡалыу

**ОТЗОВИ́ЗМ** *м*; *полит.* отзовизм (*1905—07 йй. революциянан һуң РСДРП сафтарында барлыҡҡа килгән оппортунистик ағым*)

**ОТЗОВИ́СТ** *м*; *полит.* отзовист (*отзовизм яҡлы кеше*)

**ОТЗО́Л** *м*; *спец.* **1.** *см.* **отзоли́ть** **2.** (*известковый раствор*) һелте

**ОТЗОЛИ́ТЬ** *сов. что*; *спец.* һелтеләү, (тирене) эҙбиз ҡатыш һелте менән эшкәртеү

**ОТЗО́ЛКА** *ж*; *спец. см.* **отзоли́ть**

**ОТЗО́ЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* һелте ...ы, һелтеләү ...ы; **отзо́льный чан** һелте киҫмәге

**О́ТЗЫВ** *м* **1.** *см.* **отозва́ть** **2.** (*отклик*) яуап **3.** (*оценка, рецензия*) баһа, баһалама; **о́тзыв о кни́ге** китапҡа баһалама **4.** *воен.* (*ответ на пароль*) отзыв, паролгә яуап

**ОТЗЫВА́ТЬ** *несов. см.* **отозва́ть**

**ОТЗЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отозва́ться** **2.** *страд. от* **отзыва́ть**

**ОТЗЫВНО́Й,** -ая, -ое *офиц.* саҡыртып алыу ...ы, саҡырып кире ҡайтарыу ...ы; **отзывны́е гра́моты** саҡырып ҡайтарыу ҡағыҙҙары

**ОТЗЫ́ВЧИВОСТЬ** *ж* ярҙамсыллыҡ, кеше хәленә инеүсәнлек

**ОТЗЫ́ВЧИВЫЙ,** -ая, -ое ярҙамсыл, кеше хәленә инеүсән; **отзы́вчивый челове́к** ярҙамсыл кеше

**ОТИРА́ТЬ** *несов. см.* **отере́ть**

**ОТИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отере́ться** **2.** *страд. от* **отира́ть**

**ОТКА́З** *м* **1.** *см.* **отказа́ть**, **отказа́ться** **2.** (*отрицательный ответ*) кире яуап, риза булмау, кире ҡағыу; **получи́ть отка́з** кире яуап алыу ♦ **де́йствовать (рабо́тать) без отка́за** тотҡарһыҙ (шыма, яҡшы) эшләү; **до отка́за** шығырым (тулы)

**ОТКАЗА́ТЬ** *сов.* **1.** *кому, в чём* кире ҡағыу, үтенесте үтәмәү, ризалашмау, риза булмау, баш тартыу; **отказа́ть в про́сьбе** үтенесте кире ҡағыу; **отказа́ть в по́мощи** ярҙам итеүҙән баш тартыу **2.** *кому, в чём* мәхрүм итеү, инҡар итеү, барлығын күрмәү; **отказа́ть себе́ в са́мом необходи́мом** үҙеңде иң кәрәкле нәмәләрҙән мәхрүм итеү; **ему́ нельзя́ отказа́ть в тала́нте** уның талантын инҡар итеп булмай **3.** *разг.* (*перестать действовать*) туҡталыу, эшләүҙән туҡтау, эшләмәй (башлау); **мото́р отказа́л** мотор эшләмәй башланы **4.** *разг.* (*перестать служить — о частях тела, органах чувств и т.п.*) йөрөмәү, күрмәү, туҡтау, эшләмәү; **но́ги отказа́ли** аяҡтар йөрөмәй; **глаза́ отказа́ли** күҙҙәр күрмәй ♦ **не откажи́(те)** *в чём* и *с неопр.* зинһар, зинһар өсөн

**ОТКАЗА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от чего* и *с неопр.* ризалашмау, теләмәү; **отказа́ться вы́полнить про́сьбу** һорауҙы үтәргә теләмәү; **отказа́ться от упла́ты нало́га** һалым түләргә теләмәү **2.** (*не принять, отвергнуть*) баш тартыу, кире ҡағыу, ҡабул итмәү, кире ҡайтыу (ҡайтауыллау), кире уйлау, дүнеү; **отказа́ться от насле́дства** мираҫтан баш тартыу **3.** *с неопр.* (*перестать действовать — о частях тела, органах чувств и т.п.*) йөрөмәй (күрмәй, туҡтай, сыҡмай, эшләмәй) башлау; **го́лос отказа́лся служи́ть** тауышы сыҡмай башланы; **ру́ки отказа́лись слу́шаться** ҡулдары йөрөмәй башланы **4.** *с неопр.* (*перестать действовать — о механизмах*) эшләмәй башлау, туҡтау, ватылыу, боҙолоу; **часы́ отказа́лись де́йствовать** сәғәт туҡтаны ♦ **не откажу́сь (не отказа́лся бы)** *с неопр.* ҡаршы түгел, әҙермен, баш тартмайым

**ОТКА́ЗЫВАТЬ** *несов. см.* **отказа́ть**

**ОТКА́ЗЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отказа́ться** **2.** *прост.* (*не признаваться в чём-л., отпираться*) таныу

**ОТКА́ЛЫВАТЬ I** *несов. см.* **отколо́ть** I

**ОТКА́ЛЫВАТЬ II** *несов. см.* **отколо́ть** II

**ОТКА́ЛЫВАТЬСЯ I** *несов.* **1.** *см.* **отколо́ться** I; **2.** *страд. от* **отка́лывать** I

**ОТКА́ЛЫВАТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **отколо́ться** II; **2.** *страд. от* **отка́лывать** II

**ОТКА́ПЫВАТЬ** *несов. см.* **откопа́ть**

**ОТКА́РМЛИВАНИЕ** *с см.* **отка́рмливать**

**ОТКА́РМЛИВАТЬ** *несов. см.* **откорми́ть**

**ОТКА́Т** *м* **1.** *см.* **откати́ть — отка́тывать, откати́ться** **2.** *воен.* кире биреү (тибеү), артҡа сигеү (*атҡандан һуң көбәктең йә туптың артҡа тибеүе*)

**ОТКАТА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* тәгәрләтеү, тәгәрләтеп бөтөрөү; **отката́ть бельё** керҙе тәгәрләтеү

**ОТКАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* тәгәрләтеү, тәгәрләтеп ҡуйыу (ебәреү), этеү, этеп ҡуҙғатыу (ебәреү); **откати́ть бревно́** бүрәнәне тәгәрләтеп ебәреү **2.** *разг.* (*быстро отъехать*) шәп итеп сығып китеү

**ОТКАТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** тәгәрләү, тәгәрләп китеү, ситкә тәгәрләү; **колесо́ откати́лось** тәгәрмәс тәгәрләп китте **2.** *перен.* сигенеү; **враг откати́лся** дошман сигенде

**ОТКА́ТКА** *ж* **1.** *см.* **откати́ть**, **откати́ться** **2.** *горн.* (ҡаҙылманы тышҡа) сығарыу, юғары мендереү (күтәреү); **отка́тка угля́ из ша́хты** шахтанан күмер сығарыу

**ОТКА́ТЧИК** *м*; *горн.* откатчик, (күмер, мәғдән) ташыусы

**ОТКА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **откати́ть**

**ОТКА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **откати́ться** **2.** *страд. от* **отка́тывать**

**ОТКАЧА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* һурҙырыу, һурҙырып сығарыу; **откача́ть во́ду** һыуҙы һурҙырып сығарыу **2.** *кого* һушына килтереү (*յаһалма һулыш менән*)

**ОТКА́ЧИВАНИЕ** *с см.* **отка́чивать**; **отка́чивание во́здуха** һауаны һурҙырып сығарыу

**ОТКА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **откача́ть**

**ОТКА́ЧКА** *ж*; *разг. см.* **откача́ть** 1 — **отка́чивать**

**ОТКАЧНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* ҡуҙғатып (сайҡалдырып, һелкетеп) ебәреү

**ОТКАЧНУ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һелкенеп тайпылыу, сайҡалып (ҡуҙғалып) китеү

**ОТКА́ШЛИВАТЬ** *несов. см.* **отка́шлянуть**

**ОТКА́ШЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отка́шляться** **2.** *страд. от* **отка́шливать**

**ОТКА́ШЛЯНУТЬ** *сов. что* йүткереү, йүткереп сығарыу (*тамаҡҡа ултырған ҡаҡырыҡты һ.б.*)

**ОТКА́ШЛЯТЬСЯ** *сов.* **1.** йүткереү, йүткереп (ҡаҡырыҡты) сығарыу **2.** (*прочистить горло перед тем, как говорить, петь*) тамаҡ ҡырып алыу (ҡуйыу)

**ОТКИДА́ТЬ** *сов. что* алып ташлау; **откида́ть снег** ҡарҙы алып ташлау

**ОТКИДНО́Й**, -ая, -ое асылмалы, ҡайтармалы, күтәреп ҡуйыла торған, күтәрмәле; **откидно́е сиде́нье** күтәреп ҡуйыла торған ултырғыс

**ОТКИ́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **откида́ть**, **отки́нуть**

**ОТКИ́ДЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отки́нуться** **2.** *страд. от* **отки́дывать**

**ОТКИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*отбросить*) ситкә алып ташлау, алып ырғытыу; **отки́нуть ка́мень** ташты ситкә алып ташлау **2.** *перен.* (*преодолеть*) баш тартыу, алып ташлау; **отки́нуть гру́стные мы́сли** күңелһеҙ уйҙарҙан баш тартыу **3.** *что* төшөрөү, ҡайтарыу, күтәреү, асыу, асып ҡуйыу; **отки́нуть воротни́к шу́бы** тундың яғаһын төшөрөү; **отки́нуть кры́шку роя́ля** рояль ҡапҡасын асып ҡуйыу **4.** *что* (*запрокинуть*) артҡа ташлау; **отки́нуть го́лову** башты артҡа ташлау

**ОТКИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу; **люк отки́нулся** люк асылды **2.** артҡа ташланыу (һөйәлеү); **отки́нуться на спи́нку сту́ла** ултырғыстың артына һөйәлеү

**ОТКЛА́ДЫВАТЬ** *несов. см.* **отложи́ть**

**ОТКЛА́НИВАТЬСЯ** *несов. см.* **откла́няться**

**ОТКЛА́НЯТЬСЯ** *сов.*; *уст.* хушлашыу, һаубуллашыу

**ОТКЛЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **откле́ить**

**ОТКЛЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **откле́иться** **2.** *страд. от* **откле́ивать**

**ОТКЛЕ́ИТЬ** *сов. что* һыҙырыу, ҡуптарыу, ҡуптарып алыу; **откле́ить ма́рку** марканы ҡуптарып алыу

**ОТКЛЕ́ИТЬСЯ** *сов.* ҡубыу, ҡубып сығыу, ҡубып төшөү

**ОТКЛЕПА́ТЬ** *сов. что* сүкеп төшөрөү (алыу), ҡуптарып төшөрөү (алыу)

**ОТКЛЁПЫВАТЬ** *несов. см.* **отклепа́ть**

**О́ТКЛИК** *м* **1.** (*ответ на зов*) яуап, яуап биреү (ҡайтарыу), тауыш биреү, өндәшеү **2.** *перен.* мөнәсәбәт, тәьҫир, эҙ; **душе́вный о́тклик** эскерһеҙ мөнәсәбәт **3.** *обычно мн.* **о́тклики** баһа, баһа биреү, баһалау; **о́тклики на статью́** мәҡәләгә баһа

**ОТКЛИКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **откли́кнуться**

**ОТКЛИ́КНУТЬСЯ** *сов.* **1.** яуап биреү (ҡайтарыу), тауыш биреү; **откли́кнуться на зов** саҡырыуға тауыш биреү **2.** *на что* фекер әйтеү, ҡараш белдереү; **откли́кнуться на собы́тия** ваҡиғаларға ҡарата фекер әйтеү

**ОТКЛОНЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отклони́ть** — **отклоня́ть**, **отклони́ться** — **отклоня́ться** **2.** ситкә китеү, тайпылыу, тайпылыш; **отклоне́ние от но́рмы** норманан тайпылыш

**ОТКЛОНИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*отвести в сторону*) ауыштырыу, урынынан ҡуҙғатыу (күсереү); **отклони́ть ма́ятник** маятникты бер яҡҡа ауыштырыу **2.** *кого*, *от чего*; *перен.* (*удержать, заставить отказаться*) тыйыу, тотоп ҡалыу **3.** *что*; *перен.* (*отвергнуть*) кире ҡағыу, ҡабул итмәү; **отклони́ть про́сьбу** үтенесте кире ҡағыу

**ОТКЛОНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*сдвинуться в сторону*) ауышыу, ҡуҙғалыу **2.** (*уклониться*) янтайыу, тайпылыу, тайшаныу; **отклони́ться от уда́ра** һуғыуҙан янтайыу **3.** *перен.* ситкә китеү (сығыу); **отклони́ться от те́мы** теманан ситкә сығыу

**ОТКЛОНЯ́ТЬ** *несов. см.* **отклони́ть**

**ОТКЛОНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отклони́ться** **2.** *страд.* **отклоня́ть**

**ОТКЛЮЧА́ТЬ** *несов. см.* **отключи́ть**

**ОТКЛЮЧИ́ТЬ** *сов. что* өҙөү, айырыу; **отключи́ть телефо́н** телефонды өҙөү

**ОТКОВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*изготовить ковкой*) сүкеп яһау (эшләү) **2.** (*отбить*) һуғып төшөрөү, сүкеп алыу, сүкеп алып ташлау; **отковáть подкóву** дағаны сүкеп алып ташлау

**ОТКО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **отковáть**

**ОТКОВЫ́РИВАТЬ** *несов. см.* **отковыря́ть**

**ОТКОВЫРНУ́ТЬ** *сов. см.* **отковы́ривать**

**ОТКОВЫРЯ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* соҡоп (ҡуптарып) сығарыу, ҡуптарыу; **отковыря́ть штукату́рку** штукатурканы ҡуптарып сығарыу

**ОТКОЗЫРЯ́ТЬ I** *сов.*; *карт.* уйын кәрт менән баҫыу

**ОТКОЗЫРЯ́ТЬ II** *сов. кому*; *разг.* (*в знак приветствия*) честь биреү, ҡулды козырёкка ҡуйыу (*сәләмләү*)

**ОТКОЛОТИ́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*отбить*) һуҡҡылап ҡуптарып (аҡтарып) алыу, һуҡҡылап асыу; **отколоти́ть дóску** таҡтаны һуҡҡылап ҡуптарып алыу **2.** *кого* (*избить*) туҡмау, туҡмап ташлау

**ОТКОЛО́ТЬ I** *сов.* **1.** (*отделить от целого*) ватып (китеп) алыу, ярып алыу; **отколóть кусóчек сáхару** бер киҫәк шәкәр ватып алыу **2.** *кого*; *перен.* айырып алыу; **отколóть корóву от стáда** һыйырҙы көтөүҙән айырып алыу **3.** *что*; *прост.* әйтеп ташлау, эшләп ташлау; **отколóть словцó** һүҙ әйтеп ташлау

**ОТКОЛО́ТЬ II** *сов. что* ысҡындырыу; **отколóть бант** бантты ысҡындырыу

**ОТКОЛО́ТЬСЯ I** *сов.* **1.** (*отделиться, отпасть*) ватылып (һынып) төшөү, кителеп төшөү; **льди́на отколóлась** боҙ ватылып төштө **2.** *перен.* (*порвать связь*) айырылыу, бәйләнеште өҙөү; **отколóться от друзéй** дуҫтарҙан айырылыу

**ОТКОЛО́ТЬСЯ II** *сов.* ысҡыныу; **булáвка отколóлась** төйрәүес ысҡынған

**ОТКОМАНДИРОВА́ТЬ** *сов. кого-что* командировкаға ебәреү

**ОТКОМАНДИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **откомандировáть**

**ОТКОПА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*копая, извлечь*) ҡаҙып алыу (сығарыу) **2.** *что*; *перен.*, *разг.* (*найти*) табыу, эҙләп табыу, (соҡоп) килтереп сығарыу; **откопáть рéдкую кни́гу** һирәк осрай торған китапты табыу

**ОТКО́РМ** *м*; *с.-х. см.* **откорми́ть**; **откóрм свинéй** сусҡаларҙы һимертеү

**ОТКОРМИ́ТЬ** *сов. кого* һимертеү, һуғымға ашатыу, көрәйтеү

**ОТКО́РМЛЕННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **откорми́ть 2.** *прил.* һимертелгән, һимеҙ, көр; **откóрмленная корóва** көр һыйыр

**ОТКО́РМОЧНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* һимертә торған, һимертеү ...ы; **откóрмочная бáза** һимертеү базаһы

**ОТКОРРЕКТИ́РОВАТЬ** *сов. что* төҙәтеү, төҙәтмәләр индереү

**ОТКО́С** *м* **1.** (*склон*) һөҙәк бит; **откóс холмá** ҡалҡыулыҡтың һөҙәк бите **2.** (*на железной дороге*) юл өйөмө, откос, яр аҫты; **пусти́ть пóезд под откóс** поезды яр аҫтына ебәреү **3.** *спец.* терәү, таяу

**ОТКОЧЕВА́ТЬ** *сов.* күсенеп (күсеп) китеү

**ОТКОЧЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **откочевáть**

**ОТКРЕПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое теркәүҙән төшөрөү ...ы; **открепи́тельный талóн** теркәүҙән төшөрөү талоны

**ОТКРЕПИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*отделить что-л. прикреплённое*) сисеү, айырыу, сисеп (айырып) алыу; **открепи́ть лóдку** кәмәне сисеп алыу **2.** *кого* (*снять с учёта*) теркәүҙән төшөрөү

**ОТКРЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* сиселеү, айырылыу **2.** теркәүҙән төшөү

**ОТКРЕПЛЕ́НИЕ** *с см.* **открепи́ть** — **открепля́ть**, **открепи́ться** — **открепля́ться**

**ОТКРЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **открепи́ть**

**ОТКРЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **открепи́ться 2.** *страд. от* **открепля́ть**

**ОТКРЕ́ЩИВАТЬСЯ** *несов. от кого-чего*; *разг.* (*всячески отказываться*) ситтә ҡалырға (ҡотолорға) тырышыу, баш тартыу

**ОТКРОВЕ́НИЕ** *с* **1.** асыш, яңылыҡ, яңылыҡ асыу **2.** асылына төшөнөү **3.** асыҡтан-асыҡ әйтеү, сер сисеү

**ОТКРОВЕ́ННИЧАТЬ** *несов.*; *разг.* сер асыу (сисеү), асыҡтан-асыҡ (туп-тура) һөйләшеү

**ОТКРОВЕ́ННОСТЬ** *ж* асыҡлыҡ, саф күңеллелек, эскерһеҙлек; **вы́звать на откровéнность** асыҡтан-асыҡ һөйләшергә (асыҡлыҡҡа) саҡырыу

**ОТКРОВЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое **1.** (*искренний*) саф (ысын) күңелдән, эскерһеҙ, ихлас, асыҡ; **откровéнный человéк** эскерһеҙ кеше **2.** (*явный, открытый*) асыҡтан-асыҡ, шаран-яра

**ОТКРОМСА́ТЬ** *сов. что*; *разг.* умырып (ҡайырып) алыу, ҡайырып киҫеп алыу

**ОТКРУТИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* **1.** бороп алыу (асыу, сығарыу), һүтеү; **открути́ть гáйку** гайканы бороп алыу; **открути́ть верёвку** ишелгән бауҙы һүтеү (тағатыу) **2.** бороп өҙөп алыу

**ОТКРУТИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *разг.* боролоп сығыу **2.** *перен.*, *прост.* (*отделаться от чего-л.*) хәйләләп (хәйлә менән) ҡотолоу

**ОТКРУ́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **открути́ть**

**ОТКРУ́ЧИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **открути́ться 2.** *страд. от* **откру́чивать**

**ОТКРЫВА́ЛКА** *ж*; *разг.* асҡыс; **открывáлка для консéрвов** консерва һауытын асҡыс

**ОТКРЫВА́ТЬ** *несов. см.* **откры́ть**

**ОТКРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **откры́ться 2.** *страд. от* **открывáть**

**ОТКРЫ́ТИЕ** *с* **1.** *см.* **откры́ть**; **откры́тие театрáльного сезóна** театр сезонының асылыуы **2.** асыш, уйлап табыу; **наýчное откры́тие** фәнни асыш

**ОТКРЫ́ТКА** *ж* открытка, асыҡ хат

**ОТКРЫ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **откры́ть** **2.** *прил.* асыҡ, ялан; **откры́тая ме́стность** асыҡ (ялан) ер, асыҡ урын **3.** *прил.* (*искренний*) эскерһеҙ, ихлас, саф (ысын) күңелдән; **откры́тый взгляд** эскерһеҙ ҡараш **4.** *прил.* (*явный, прямой*) асыҡтан-асыҡ, туранан-тура; **откры́тая борьба́** асыҡтан-асыҡ көрәш ♦ **откры́тый вопро́с** хәл ителмәгән мәсьәлә; **откры́тое голосова́ние** асыҡ тауыш биреү; **откры́тый лоб** киң маңлай; **откры́тое письмо́** асыҡ хат (*гәзиттә, журналда баҫылған хат*); **откры́тая ра́на** асыҡ яра; **откры́тый слог** *лингв.* асыҡ ижек; **в откры́тую** асыҡтан-асыҡ, йәшермәйенсә; **под откры́тым не́бом** асыҡ һауала, тышта; **с откры́тыми глаза́ми** маҡсатты (мәсьәләне) яҡшы аңлап, айыҡ аҡыл менән

**ОТКРЫ́ТЬ** *сов. что* **1.** *в разн. знач.* асыу; **откры́ть дверь** ишек асыу; **откры́ть кры́шку** ҡапҡасты асыу; **откры́ть путь** юл асыу **2.** *разг.* (*ввести в действие, пустить*) ебәреү, биреү; **откры́ть во́ду** һыу ебәреү **3.** (*положить начало*) асыу, башлау, башлап ебәреү; **откры́ть но́вую шко́лу** яңы мәктәп асыу; **откры́ть собра́ние** йыйылышты асыу **4.** (*установить наличие чего-л. путём исследования*) асыу, табыу; **откры́ть нефтяны́е месторожде́ния** нефть ятҡылыҡтарын табыу ♦ **откры́ть Аме́рику** *ирон.* Америка асыу (*күптән билдәле булғанды яңылыҡ итеп һөйләү*); **откры́ть глаза́** дөрөҫлөктө асып биреү, күҙен асыу (*аңлатыу*)

**ОТКРЫ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу; **окно́ откры́лось** тәҙрә асылды; **ра́на откры́лась** яра асылған **2.** *перен.* (*стать доступным*) киң асылыу, асылған булыу; **пе́ред на́ми откры́лись все пути́** беҙҙең алда бөтә юлдар асылған **3.** (*стать видным*) асылыу, күренеү, күренә башлау; **пе́ред на́ми откры́лся краси́вый вид** беҙҙең алда матур күренеш асылды **4.** *перен.* (*стать понятным*) аңлашылыу, асыҡланыу, беленеү; **откры́лась взаимосвя́зь собы́тий** ваҡиғалар бәйләнеше асыҡланды **5.** (*признаться*) дөрөҫөн әйтеп биреү, серҙе асыу; **он во всём откры́лся** ул бөтә серен асып һалды **6.** (*начаться*) башланыу; **навига́ция откры́лась** навигация башланды ♦ **глаза́ откры́лись** *у кого* күҙе асылды

**ОТКУ́ДА** *нареч.* ҡайҙан, ҡайһы ерҙән, ҡайһы урындан; **отку́да прие́хал?** ҡайҙан килдең? ♦ **отку́да ни возьми́сь** көтмәгәндә, көтмәгән (уйламаған) ерҙән

**ОТКУ́ДА-НИБУДЬ** и **ОТКУ́ДА-ЛИБО** *нареч.* ҡайҙан булһа ла

**ОТКУ́ДА-ТО** *нареч.* әллә ҡайҙан, ҡайҙандыр

**О́ТКУП** *м* откуп, йолом (**1.** *тар. хосуси кешегә дәүләт һалымдарын йыйырға бирелгән хоҡуҡ* **2.** *берәй нәмәнән ҡотолоу өсөн түләнгән аҡса*)

**ОТКУПИ́ТЬСЯ** *сов.*; *уст.* хаҡ биреп (түләп) ҡотолоу, йолом биреп ҡотолоу

**ОТКУПНО́Й,** -ая, -ое *ист.* откуп ...ы, йолом ...ы; **откупна́я систе́ма торго́вли** һатыу итеүҙә откуп системаһы

**ОТКУ́ПОРИВАНИЕ** *с см.* **отку́поривать**

**ОТКУ́ПОРИВАТЬ** *несов. см.* **отку́порить**

**ОТКУ́ПОРИТЬ** *сов. что* асыу, бөкөһөн (тығынын) алыу; **отку́порить буты́лку** шешәне асыу

**ОТКУ́ПОРКА** *ж см.* **отку́порить** — **отку́поривать**

**ОТКУПЩИ́К** *м*; *ист.* откупщик (*откуп хужаһы*)

**ОТКУСИ́ТЬ** *сов. что, чего* **1.** тешләп (айырыу) алыу; **откуси́ть хле́ба** бер ҡабым икмәк тешләп алыу **2.** *тех.* (*ҡыпсыуыр менән*) өҙөү, ҡырҡыу, өҙөп (ҡырҡып) алыу; **откуси́ть коне́ц про́волоки** тимерсыбыҡ осон өҙөп алыу

**ОТКУ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **откуси́ть**

**ОТЛАГА́ТЕЛЬСТВО** *с*; *книжн.* кисектереү, һуңлатыу

**ОТЛАГА́ТЬ** *несов. см.* **отложи́ть**

**ОТЛАГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отложи́ться** **2.** *страд. от* **отлага́ть**

**ОТЛАКИРОВА́ТЬ** *сов. что* лаклау, лаклап ҡуйыу, лак менән ялтыратыу; **отлакирова́ть шкаф** шкафты лаклау

**ОТЛА́МЫВАТЬ** *несов. см.* **отлома́ть**, **отломи́ть**

**ОТЛА́МЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отлома́ться**, **отломи́ться** **2.** *страд. от* **отла́мывать**

**ОТЛЕЖА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (ипһеҙ ятып) ойотоу; **отлежа́ть ру́ку** ипһеҙ ятып ҡулды ойотоу **2.** *разг.* (*о больном*) тора алмай ятыу; **он отлежа́л це́лый ме́сяц** ул бер ай буйына тора алмай ятты

**ОТЛЕЖА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* **1.** (*отдохнуть*) ял итеү, ятып хәл алыу **2.** ятып бешеү, ятып өлгөрә төшөү; **недозре́лые я́блоки отлежа́лись** сей алмалар ятып beште

**ОТЛЁЖИВАТЬ** *несов. см.* **отлежа́ть** 1

**ОТЛЁЖИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отлежа́ться** **2.** *страд. от* **отлёживать**

**ОТЛЕПИ́ТЬ** *сов. что*; *разг.* ҡуптарыу, ҡуптарып алыу

**ОТЛЕПИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡубыу, ҡубып төшөү (сығыу)

**ОТЛЕПЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отлепи́ть**

**ОТЛЕПЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отлепи́ться** **2.** *страд. от* **отлепля́ть**

**ОТЛЁТ** *м см.* **отлете́ть** 1; **отлёт птиц** ҡоштарҙың осоп китеүе ♦ **на отлёте** ситтә, бер яҡ ситтәрәк

**ОТЛЕТА́ТЬ I** *несов. см.* **отлете́ть**

**ОТЛЕТА́ТЬ II** *сов.* **1.** (*кончить летать*) осоп туҡтау, осоуҙан туҡтау **2.** *что*; *разг.* (*пробыть в авиации*) осоусы булып эшләү; **он отлета́л пятна́дцать лет** ул ун биш йыл осоусы булып эшләне

**ОТЛЕТА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* (*о лётчике*) осоуҙан туҡтау

**ОТЛЕТЕ́ТЬ** *сов.* **1.** (*улететь*) осоп китеү **2.** (*отскочить*) ҡаҡлығып һикереп китеү, осоп китеү; **мяч отлете́л далеко́** туп йыраҡҡа осоп китте **3.** *разг.* (*оторваться*) өҙөлөп төшөү, төшөп ҡалыу; **пу́говица отлете́ла** төймә өҙөлөп төштө

**ОТЛЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** баҫылыу, туҡтау; **боль отлегла́** ауыртыу баҫылды **2.** *безл.* (*испытать облегчение*) еңеләйеп китеү (ҡалыу), тынысланыу, баҫылыу; **от се́рдца отлегло́** йөрәк баҫылды

**ОТЛИ́В** *м* **1.** *см.* **отли́ть** — **отлива́ть** **2.** *мор.* һыу кәмеү (ҡайтыу); **начался́ отли́в** һыу ҡайта башланы **3.** *перен.* (*убыль*) кәмеү, ҡайтыу, төшөү **4.** (*оттенок цвета*) кеүек, һымаҡ, -һыл/-һел, -һыу/-һеү; **чёрный с си́ним отли́вом** күкһел ҡара

**ОТЛИВА́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отли́ть** **2.** *чем* булып күренеү (ялтырау), һымаҡ күренеү (ялтырау); **отлива́ет зелёным** йәшел булып күренә

**ОТЛИВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отли́ться** **2.** *чем* булып күренеү (ялтырау), һымаҡ күренеү (ялтырау) **3.** *страд.* *от* **отлива́ть**

**ОТЛИ́ВКА** *ж* **1.** *спец.* *см.* **отли́ть** 2, 4; **2.** *тех.* (*изделие*) ҡойолма, ҡойоп яһалған нәмә; **чугу́нная отли́вка** суйындан ҡойоп яһалған нәмә

**ОТЛИПА́ТЬ** *несов.* *см.* **отли́пнуть**

**ОТЛИ́ПНУТЬ** *сов.*; *разг.* ҡубып төшөү, ҡубып сығыу; **ма́рка отли́пла** марка ҡубып сыҡҡан

**ОТЛИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего* (бер аҙ) ағыҙыу, ҡойоу, һалыу, ағыҙып (ҡойоп, һалып) алыу; **отли́ть молока́** һөт ҡойоп алыу **2.** *что*; *спец.* (*выкачиванием удалить*) һоҫоп (һурҙырып) алып бөтөрөү **3.** (*отхлынуть*) кире китеү, кире ағып китеү **4.** *что* (*изготовить литьём*) ҡойоу, ҡойоп яһау (эшләү); **отли́ть па́мятник** һәйкәл ҡойоу

**ОТЛИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ҡойолоу, ҡойоп яһалыу; **дета́ль хорошо́ отлила́сь** деталь яҡшы итеп ҡойоп яһалған **2.** *перен.* кәүҙәләнеү, кәүҙәләнеш табыу, формаһын алыу ♦ **отолью́тся слёзы** *чьи*, *кому* ҡарғышы (күҙ йәше) төшөр әле, күрәсәген күрер әле

**ОТЛИЧА́ТЬ** *несов.* *см.* **отличи́ть**

**ОТЛИЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отличи́ться** **2.** *чем* (*выделяться*) айырылыу, айырылып тороу, айырмаһы булыу **3.** *страд.* *от* **отлича́ть**

**ОТЛИ́ЧИЕ** *с* айырма, айырмалыҡ, айырымлыҡ; **суще́ственное отли́чие** һиҙелерлек айырма ♦ **в отличие от** *кого-чего* *берәйһенән* (*берәр нәмәнән*) айырмалы рәүештә

**ОТЛИЧИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** айырыу …ы, айыра торған; **отличи́тельный знак** айыра торған билдә **2.** (*характе́рный*) мөһим, әһәмиәтле; **отличи́тельная осо́бенность** мөһим (үҙенә генә хас, айырмалы) үҙенсәлек

**ОТЛИЧИ́ТЬ** *сов.* *кого-что* **1.** айырыу, айыра белеү, таныу; **отличи́ть хоро́шее от плохо́го** яҡшыны ямандан айырыу **2.** (*отметить наградой*) бүләкләү, бүләк биреү; **отличи́ть борца́** көрәшсене бүләкләү

**ОТЛИЧИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** айырылып тороу, алдын (өҫтөн) сығыу, уңыш ҡаҙаныу, батырлыҡ күрһәтеү; **отличи́ться в бою́** һуғышта батырлыҡ күрһәтеү **2.** *разг.*, *ирон.* ахмаҡлыҡ эшләп ташлау

**ОТЛИ́ЧНИК** *м* и **ОТЛИ́ЧНИЦА** *ж* отличник

**ОТЛИ́ЧНО** **1.** *нареч.* (*очень хорошо*) бик яҡшы (шәп, һәйбәт) **2.** *в знач. сказ.* ярай, ярар, һәйбәт, бик шәп, яҡшы; **он сейча́с придёт.** — **Отли́чно!** ул хәҙер килер. — Бик яҡшы! **3.** *в знач. сущ.* **отли́чно** *с нескл.* бик яҡшы, бишле; **учи́ться на отли́чно** бишлегә уҡыу

**ОТЛИ́ЧНЫЙ,** -ая, -ое **1.** *от кого-чего* (*отличающийся*) айырылып торған **2.** (*очень хороший*) бик яҡшы (шәп); **отли́чное настрое́ние** бик яҡшы кәйеф

**ОТЛО́В** *м*; *спец.* *см.* **отлови́ть** 2

**ОТЛОВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* и *без доп.*; *разг.* (*кончить ловить*) тотоуҙан туҡтау, тотмай башлау **2.** *кого-что* *спец.* (*выловить*) тотоп бөтөрөү, тотоп алыу

**ОТЛО́ГИЙ,** -ая, -ое һөҙәк; **отло́гий бе́рег** һөҙәк яр

**ОТЛОЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отложи́ть** 5, 6, **отложи́ться**; **отложе́ние соле́й** тоҙ ултырыу **2.** *геол.* ултырма, ҡатлам; **известко́вые отложе́ния** эзбиз ултырмалар ♦ **жировы́е отложе́ния** май ҡатламдары

**ОТЛОЖИ́ТЬ** *сов.* *что* **1.** ситкә алып ҡуйыу (һалыу), айырып алып ҡуйыу; **отложи́ть кни́гу** китапты айырып алып ҡуйыу **2.** һаҡлау, йыйып ҡуйыу; **отложи́ть де́ньги на пальто́** пальтоға аҡса һаҡлау **3.** *что* (*отсрочить*) кисектереү; **отложи́ть доигрывание ша́хматной па́ртии** шахмат партияһын уйнап бөтөрөүҙе кисектереү **4.** *кого-что*; *уст.* (*выпрячь*) туғарыу; **отложи́ть лошаде́й** аттарҙы туғарыу **5.** *что*; *биол.* һалыу, сәсеү; **отложи́ть икру́** ыуылдырыҡ сәсеү **6.** *что*; *геол.* ултырыу **7.** (*опустить*) ҡайтарып ҡуйыу, төшөрөп ҡуйыу; **отложи́ть воротни́к** яғаны төшөрөп ҡуйыу ♦ **отложи́ть в до́лгий я́щик** бик оҙаҡҡа һуҙыу

**ОТЛОЖИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*осесть в виде слоя*) ултырыу, ҡатлам булып ултырыу **2.** *перен.* (*запечатлеться*) тороп ҡалыу, иҫтә ҡалыу; **отложи́ться в душе́** күңелдә тороп ҡалыу

**ОТЛОЖНО́Й:** **отложно́й воротни́к** ҡайтарма яға

**ОТЛОМА́ТЬ** *сов.* *что* һындырып алыу (төшөрөү, сығарыу); **отлома́ть сук** ботаҡ һындырып алыу

**ОТЛОМА́ТЬСЯ** *сов.* һынып төшөү (сығыу)

**ОТЛОМИ́ТЬ** *сов.* *что* һындырып алыу (төшөрөү), ватыу, ватып төшөрөү

**ОТЛОМИ́ТЬСЯ** *сов.* һынып төшөү (сығыу), ватылып төшөү

**ОТЛУПИ́ТЬ** *сов. кого*; *прост.* нык туҡмау, дөмбәҫләү

**ОТЛУЧА́ТЬ** *несов. см.* **отлучи́ть**

**ОТЛУЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отлучи́ться** **2.** *страд. от* **отлуча́ть**

**ОТЛУЧЕ́НИЕ** *с см.* **отлучи́ть** — **отлуча́ть**

**ОТЛУЧИ́ТЬ** *сов. от кого, от чего*; *уст.* (*изгнать*) ҡыуыу, һөрөү; **отлучи́ть от це́ркви** сиркәүҙән ҡыуыу ♦ **отлучи́ть от груди́** имсәктән айырыу

**ОТЛУЧИ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* китеп тороу, юҡ булып тороу, сығып тороу; **отлучи́ться на мину́тку** бер минутҡа ғына китеп тороу

**ОТЛУ́ЧКА** *ж* китеү, китеп тороу, юҡ булыу; **самово́льная отлу́чка** рөхсәтһеҙ китеү

**ОТЛЫ́НИВАТЬ** *несов.*; *разг.* ялҡауланыу, (һылтау табып) баш тартыу

**ОТМА́ЛЧИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отмолча́ться**

**ОТМА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **отмота́ть**

**ОТМАХА́ТЬ** *сов. что*; *прост.* тиҙ (шәп) үтеү, елеп уҙыу; **отмаха́ть со́рок вёрст** ҡырҡ саҡрымды елеп уҙыу

**ОТМА́ХИВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отмаха́ть** **2.** *см.* **отмахну́ть**

**ОТМА́ХИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отмахну́ться**

**ОТМАХНУ́ТЬ** *сов. что* (*отогнать*) ҡул һелтәп ҡыуыу

**ОТМАХНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*отогнать от себя*) ҡул һелтәп ҡыуып ебәреү **2.** *перен.*, *разг.* (*оставить без внимания*) ҡул һелтәү (ризаһыҙлыҡ белдереп), иғтибарһыҙ ҡарау

**ОТМА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **отмочи́ть**

**ОТМЕЖЕВА́НИЕ** *с см.* **отмежева́ть**, **отмежева́ться**

**ОТМЕЖЕВА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*отделить межой*) межалау, межалап алыу, сик менән айырыу **2.** *кого-что*; *перен.* (*отделить, обособить*) айырып (бүлеп) алыу, айырымландырыу

**ОТМЕЖЕВА́ТЬСЯ** *сов. от кого-чего* **1.** (*отделиться межой*) межа (ыҙан) менән айырылыу **2.** *перен.* (*отделиться*) айырылыу, айырылып сығыу **3.** *перен.* (*прекратить общение*) аралашмай башлау, араны өҙөү

**ОТМЕЖЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **отмежева́ть**

**ОТМЕЖЁВЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отмежева́ться** **2.** *страд. от* **отмежёвывать**

**О́ТМЕЛЬ** *ж* һайлыҡ, һай урын

**ОТМЕ́НА** *ж см.* **отмени́ть** — **отменя́ть**; **отме́на спекта́кля** спектаклде ҡуймау; **отме́на реше́ния суда́** суд ҡарарын ғәмәлләштермәү (юҡҡа сығарыу)

**ОТМЕНИ́ТЬ** *сов. что* бөтөрөү, юҡҡа сығарыу, туҡтатыу, булдырмау, үткәрмәү, ғәмәлгә ашырмау, ғәмәлләштермәү; **отмени́ть ка́рточную систе́му** карточка системаһын бөтөрөү; **отмени́ть прика́з** приказды үткәрмәү

**ОТМЕ́ННЫЙ,** -ая, -ое бик яҡшы (һәйбәт, шәп), уғата яҡшы; **отме́нная рабо́та** бик яҡшы эш

**ОТМЕНЯ́ТЬ** *несов. см.* **отмени́ть**

**ОТМЕРЕ́ТЬ** *сов.* **1.** ҡороу, һулыу; **побе́ги о́тмерли** үҫентеләр ҡороған **2.** *перен.* бөтөү, үлеү, юҡҡа сығыу, онотолоу

**ОТМЕРЗА́ТЬ** *несов. см.* **отмёрзнуть**

**ОТМЁРЗНУТЬ** *сов.* **1.** (*погибнуть от холода*) һәләк булыу, туңыу; **молоды́е побе́ги отмёрзли** йәш үҫентеләр туңып һәләк булған **2.** *разг.* өшөү, туңыу; **па́льцы отмёрзли** бармаҡтар туңды

**ОТМЕ́РИВАТЬ** *несов. см.* **отме́рить**

**ОТМЕ́РИТЬ** *сов. что* үлсәү, үлсәп алыу (биреү, ҡуйыу)

**ОТМЕРЯ́ТЬ** *несов. см.* **отме́рить**

**ОТМЕСТИ́** *сов. что* **1.** һепереп ташлау, һепереп ҡуйыу (төшөрөү); **отмести́ снег от крыльца́** тупһалағы ҡарҙы һепереп төшөрөү **2.** *перен.* (*отвергнуть*) кире ҡағыу, юҡҡа сығарыу; **отмести́ до́воды проти́вников** ҡаршы сығыусыларҙың дәлилдәрен кире ҡағыу

**ОТМЕ́СТКА** *ж*; *разг.* үс ♦ **в отме́стку** үс итеп, үсләшеп

**ОТМЕТА́ТЬ** *несов. см.* **отмести́**

**ОТМЕ́ТИНА** *ж* **1.** (*знак, метка*) билдә, тамға, мөһөр **2.** (*пятно*) ҡашҡа; **ло́шадь с отме́тиной на лбу** ҡашҡа ат **3.** (след) эҙ; **отме́тины ла́пок на снегу́** ҡарҙа табан эҙҙәре

**ОТМЕ́ТИТЬ** *сов. кого-что* **1.** билдәләү, билдә ҡуйыу, тамғалау, тамға (мөһөр) һалыу (баҫыу); **отме́тить на ка́рте** картала билдәләү **2.** яҙып алыу, теркәү, билдә ҡуйыу, билдәләү; **отме́тить опозда́вших** һуңға ҡалыусыларҙы яҙып алыу **3.** *что* (*подчеркнуть*) әйтеп китеү, иҫкә алып китеү, күрһәтеп үтеү; **отме́тить недоста́тки в рабо́те** эштәге етешһеҙлектәрҙе әйтеп китеү **4.** (*обратить внимание*) иғтибар итеү, әһәмиәт биреү, ҡағылып китеү, күрһәтеп үтеү; **отме́тить досто́инства рома́на** романдың ыңғай яҡтарын күрһәтеп үтеү **5.** бүләк менән билдәләп үтеү, бүләкләү; **отме́тить передовико́в** алдынғыларҙы бүләкләү

**ОТМЕ́ТИТЬСЯ** *сов.* **1.** билдәләнеү, яҙылыу, теркәлеү; **отме́титься в ве́домости** ведомоста теркәлеү **2.** *разг.* (*при выезде*) йорт кенәгәһенән төшөү

**ОТМЕ́ТКА** *ж* **1.** *см.* **отме́тить** 1, 2, 5; **2.** (*знак*) билдә, тамға; **отме́тка карандашо́м** ҡәләм менән яһалған билдә **3.** (*оценка*) билдә; **получи́ть хоро́шую отме́тку** яҡшы билдә алыу

**ОТМЕЧА́ТЬ** *несов. см.* **отме́тить**

**ОТМЕЧА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отме́титься** **2.** (*наблюдаться*) һиҙелеү, күренеү, беленеү; **от-**

**меча́ется пониже́ние температу́ры** температураның түбәнәйеүе һиҙелә **3.** *страд. от* **отмеча́ть**

**ОТМИРА́НИЕ** *с см.* **отмере́ть**

**ОТМИРА́ТЬ** *несов. см.* **отмере́ть**

**ОТМОКА́ТЬ** *несов. см.* **отмо́кнуть**

**ОТМО́КНУТЬ** *сов.* **1.** (*отсыреть*) еүешләнеү, еүешләнеп ебеү; **по́рох отмо́к** дары еүешләнгән **2.** еүешләнеп ҡубыу; **ма́рка отмо́кла** марка еүешләнеп ҡупҡан

**ОТМОЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **отмолоти́ть**

**ОТМОЛОТИ́ТЬ** *сов.* **1.** ашлыҡ һуғыу (һуғып алыу) **2.** *что* и *без доп.* (*закончить молотьбу*) һуғып бөтөрөү; **отмолоти́ть рожь** арышты һуғып бөтөрөү

**ОТМОЛЧА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* өндәшмәй ҡалыу, яуап бирмәү, яуап бирмәй ҡалыу

**ОТМОРА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **отморо́зить**

**ОТМОРО́ЗИТЬ** *сов. что* өшөтөү, өшөттөрөү, туңдырыу; **отморо́зить нос** танауҙы өшөтөү

**ОТМОТА́ТЬ** *сов. что, чего* һүтеп (тағатып) алыу; **отмота́ть мото́к ше́рсти** бер йомғаҡ йөндө тағатып алыу

**ОТМОЧИ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*намочив, отделить*) еүешләп (сылатып) ҡуптарып алыу; **отмочи́ть бинт** бинтты сылатып ҡуптарып алыу **2.** *спец.* ебетеү; **отмочи́ть шку́ру** тире ебетеү

**ОТМУ́ЧИТЬСЯ** *сов.*; *разг.* интегеүҙән ҡотолоу, ғазапланыуҙан туҡтау

**ОТМЩЕ́НИЕ** *с* үс алыу

**ОТМЫВА́ТЬ** *несов. см.* **отмы́ть**

**ОТМЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отмы́ться** **2.** *страд. от* **отмыва́ть**

**ОТМЫКА́ТЬ** *несов. см.* **отомкну́ть**

**ОТМЫКА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отомкну́ться** **2.** *страд. от* **отмыка́ть**

**ОТМЫ́КАТЬСЯ** *сов.*; *фольк.* (*отмучиться, умереть*) яфанан (ғазаптан) ҡотолоу (арыныу), фани донъянан китеү, үлеп ҡалыу

**ОТМЫ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** йыуыу, йыуып таҙартыу (алыу, төшөрөү); **отмы́ть ча́шку** сынаяҡты йыуып таҙартыу **2.** (*размывая, отделить*) өңөү, ашау; **вода́ отмы́ла бе́рег** һыу ярҙы ашаған

**ОТМЫ́ТЬСЯ** *сов.* йыуылыу, йыуылып таҙарыу, йыуылып төшөү

**ОТМЫ́ЧКА** *ж* отмычка (*асҡысһыҙ йоҙаҡ асыу ҡоралы*)

**ОТМЯКА́ТЬ** *несов. см.* **отмя́кнуть**

**ОТМЯ́КНУТЬ** *сов.*; *разг.* ебеү, йомшарыу

**ОТНЕ́КИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* баш тартыу, риза булмау, кирелэнеү

**ОТНЕСТИ́** *сов. кого-что* **1.** (*доставить*) илтеү, илтеп биреү, илтеп ҡуйыу, алып барыу, алып барып ҡуйыу; **отнести́ письмо́ на по́чту** хатты почтаға алып барыу **2.** (*перенести на какое-л. расстояние*) күсереп (алып) ҡуйыу (китеү); **отнести́ ка́мень от доро́ги** ташты юлдан алып ҡуйыу; **ве́тер отнёс дым в сто́рону** ел төтөндө ситкә алып китте **3.** (*причислить*) тип иҫәпләү (һанау, ҡарау); **отнести́ руко́пись к двена́дцатому ве́ку** ҡулъяҙманы ун икенсе быуатта яҙылған тип һанау ♦ **отнести за счёт (на счёт)** *кого-чего* иҫәбенә (хисабына) индереү

**ОТНЕСТИ́СЬ** *сов. к кому-чему* ҡарау, күрһәтеү, мөғәмәлә итеү; **отнести́сь к больно́му внима́тельно** ауырыуға иғтибар менән ҡарау

**ОТНИМА́ТЬ** *несов. см.* **отня́ть**

**ОТНИМА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отня́ться** **2.** *страд. от* **отнима́ть**

**ОТНОСИ́ТЕЛЬНО** *нареч.* и *предлог* **1.** *нареч.* сағыштырмаса, аҙмы-күпме; **состоя́ние относи́тельно хоро́шее** хәл сағыштырмаса яҡшы **2.** *предлог с род. п.* тураһында, ҡарата, хаҡында; **относи́тельно его́ возвраще́ния све́дений нет** уның әйләнеп ҡайтыуы тураһында мәғлүмәттәр юҡ

**ОТНОСИ́ТЕЛЬНОСТЬ** *ж* нисбәтлек, сағыштырмалыҡ ♦ **тео́рия относи́тельности** сағыштырмалыҡ теорияһы

**ОТНОСИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** сағыштырма, сағыштырмаса; **относи́тельная глубина́** сағыштырмаса тәрәнлек **2.** (*сравнительно небольшой*) артыҡ ҙур булмаған; **относи́тельный успе́х** артыҡ ҙур булмаған уңыш **3.** *грам.* шартлы; **относи́тельное прилага́тельное** шартлы сифат; **относи́тельное местоиме́ние** билдәләү алмаштары

**ОТНОСИ́ТЬ** *несов. см.* **отнести́**

**ОТНОСИ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отнести́сь** **2.** (*входить в число чего-л.*) инеү **3.** *к кому-чему* бәйләнеше (ҡыҫылышы, ҡағылышы, ҡатнашы, ҡатнашлығы) булыу (булмау), ҡағылыу; **э́тот вопро́с к те́ме докла́да не отно́сится** был мәсьәлә доклад темаһына ҡағылмай **4.** *страд. от* **относи́ть**

**ОТНОШЕ́НИЕ** *с* **1.** ҡараш, мөнәсәбәт; **отноше́ние к жи́зни** тормошҡа ҡараш; **бе́режное отноше́ние к иму́ществу** мөлкәткә һаҡсыл мөнәсәбәт **2.** *мн.* **отноше́ния** мөнәсәбәт, бәйләнеш; **семе́йные отноше́ния** ғаилә мөнәсәбәттәре; **дру́жеские отноше́ния** дуҫлыҡ бәйләнештәре **3.** (*официальная бумага*) эш ҡағыҙы, рәсми ҡағыҙ ♦ **в отноше́нии** *кого-чего*; **по отноше́нию** *к кому-чему в знач. предлога* ҡарата, яғынан; **в не́котором (э́том) отноше́нии** ҡайһылыр яҡтан, ниндәйҙер мәғәнәлә; **во всех отноше́ниях** бөтә яҡтан да

**ОТНЫ́НЕ** *нареч.*; *книжн.* бөгөндән алып (башлап), бынан һуң, бынан былай (түбән)

**ОТНЮ́ДЬ** *нареч.* бер ҙә, һис тә, бер нисек тә; **отню́дь не так** бер ҙә улай түгел

**ОТНЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*взять силой*) көсләп (тартып) алыу, талап алыу **2.** *что*; *перен.* (*лишить чего-л.*) мәхрүм итеү, өҙөү, юҡҡа сығарыу; **отня́ть наде́жду** өмөтөн өҙөү **3.** *что* (*убрать*) (тартып) алыу, алып ҡуйыу; **отня́ть ле́стницу от стены́** баҫҡысты стенанан алып

ҡуйыу **4.** *что*; *разг.* (*ампутировать*) ҡырҡыу, ҡырҡып алыу **5.** *что* (*потратить время, энергию*) алыу; **рабо́та отняла́ мно́го сил** эш күп көстө алды **6.** *что*; *разг.* (*вычесть*) алыу; **от пяти́ отня́ть два** биштән икене алыу ♦ **отня́ть жизнь** йәнен алыу; **отня́ть от груди́** имсәктән айырыу

**ОТНЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** хәрәкәт итеүҙән (йөрөүҙән) туҡтау, -тан/-тән ҡалыу; **нога́ отняла́сь** аяҡтан ҡалыу **2.** *разг.* (*онеметь от волнения, испуга и т.п.*) ойоу, -һыҙ/-һеҙ ҡалыу; **язы́к отня́лся** телһеҙ ҡалыу

**ОТО** *предлог см.* **от** ♦ **день ото дня** көндән көнгә

**ОТО...** *приставка см.* **от...**

**ОТОБЕ́ДАТЬ** *сов.* (*кончить обедать*) төшкө ашты ашап бөтөү

**ОТОБРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **отобрази́ть**

**ОТОБРАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отобрази́ться 2.** *страд. от* **отобража́ть**

**ОТОБРАЖЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отобрази́ть** – **отобража́ть 2.** (*изображение*) кәүҙәләнеш, сағылыш, һүрәтләнеш, тасуир

**ОТОБРАЗИ́ТЬ** *сов. кого-что* кәүҙәләндереү, сағылдырыу, һүрәтләндереү, тасуирлау

**ОТОБРАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* кәүҙәләнеү, сағылыу, һүрәтләнеү, тасуирланыу

**ОТОБРА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*отнять*) тартып алыу **2.** (*взять обратно*) кире алыу **3.** (*выбрать*) айырыу, айырып алыу, һайлау, һайлап алыу; **отобра́ть семена́** орлоҡ һайлап алыу

**ОТОВА́РИВАНИЕ** *с см.* **отова́рить**

**ОТОВА́РИВАТЬ** *несов. см.* **отова́рить**

**ОТОВА́РИТЬ** *сов. что*; *спец.* тауар биреү, тауар менән тәьмин итеү

**ОТОВСЮ́ДУ** *нареч.* унан-бынан, һәр урындан, һәр яҡтан (яҡлап)

**ОТОГНА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ҡыуыу, ҡыуалау, ҡыуып ебәреү; **отогна́ть соба́ку** этте ҡыуып ебәреү **2.** *кого-что*; *с.-х.* (*перегнать*) ҡыуыу; **отогна́ть ове́ц на па́стбище** һарыҡтарҙы көтөүлеккә ҡыуыу **3.** *что*; *перен.* баштан сығарыу (сығарып ташлау); **отогна́ть тяжёлые мы́сли** ауыр уйҙарҙы баштан сығарыу **4.** *что*; *спец.* (*добыть перегонкой*) ҡыуыу, ҡыуып алыу; **отогна́ть скипида́р** скипидар ҡыуып алыу

**ОТОГНУ́ТЬ** *сов. что* **1.** (*распрямить*) турайтыу, яҙыу, төҙәйтеү; **отогну́ть гвоздь** ҡаҙауҙы төҙәйтеү **2.** (*в сторону, вверх, вниз*) эйеү, бөгөү, эйеп (бөгөп, күтәреп) ҡуйыу, күтәреү, ҡайтарыу; **отогну́ть ска́терть** ашъяулыкты күтәреп ҡуйыу; **отогну́ть рукава́** еӊ ҡайтарыу

**ОТОГНУ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*распрямиться*) турайыу, яҙылыу, төҙәйеү **2.** (*в сторону, вверх, вниз*) эйелеү, бөгөлөү, күтәрелеү, ҡайтарылыу

**ОТОГРЕВА́ТЬ** *несов. см.* **отогре́ть**

**ОТОГРЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отогре́ться 2.** *страд. от* **отогрева́ть**

**ОТОГРЕ́ТЬ** *сов. кого-что* йылытыу, йылытып алыу; **отогре́ть но́ги** аяҡтарҙы йылытыу

**ОТОГРЕ́ТЬСЯ** *сов.* йылыныу, йылынып алыу

**ОТОДВИГА́ТЬ** *несов. см.* **отодви́нуть**

**ОТОДВИГА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отодви́нуться 2.** *страд. от* **отодвига́ть**

**ОТОДВИ́НУТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* этеү, этәреү, шылдырыу, этеп (этәреп, шылдырып) ҡуйыу, күсереү, күсереп ҡуйыу; **отодви́нуть стол** өҫтәлде күсереп ҡуйыу **2.** *что*; *перен., разг.* (*отсрочить*) кисектереү, күсереү; **отодви́нуть экза́мен** имтиханды күсереү

**ОТОДВИ́НУТЬСЯ** *сов.* **1.** күсеү, шыуыу, күсеп (шыуып) ултырыу; **отодви́нуться в у́гол** мөйөшкә күсеп ултырыу **2.** *перен., разг.* кисектерелеү, күсерелеү; **срок отодви́нулся** срок кисектерелде

**ОТОДРА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*оторвать*) ҡуптарыу, ҡуптарып алыу, һыҙырыу, һыҙырып алыу; **отодра́ть до́ску** таҡтаны ҡуптарып алыу; **отодра́ть обо́и** обойҙарҙы һыҙырып алыу **2.** *кого*; *разг.* (*высечь*) туҡмау, һыҙырыу **3.** *кого*; *разг.* (*наказывая, дёргать за уши, за волосы*) тартыу, бороу; **отодра́ть за́ уши** ҡолағын бороу

**ОТОДРА́ТЬСЯ** *сов.*; *прост.* ҡубып төшөү (сығыу)

**ОТОЖДЕСТВИ́ТЬ** и **ОТОЖЕСТВИ́ТЬ** *сов. кого-что* тиӊләштереү, тиӊләү, тиӊ итеп күреү (таныу), тиӊ һанау

**ОТОЖДЕСТВЛЕ́НИЕ** *с см.* **отождестви́ть**

**ОТОЖДЕСТВЛЯ́ТЬ** и **ОТОЖЕСТВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отождестви́ть**

**ОТОЗВА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** саҡырыу, саҡырып алыу; **отозва́ть соба́ку** этте саҡырыу **2.** саҡырып ҡайтарыу; **отозва́ть посла́** илсене саҡырып ҡайтарыу

**ОТОЗВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** яуап биреү, яуап ҡайтарыу; **никто́ не отозва́лся** бер кем дә яуап ҡайтарманы; **отозва́ться на про́сьбу** үтенескә яуап биреү **2.** *на ком-чём* (*сказаться*) тәьҫир итеү, сағылыу; **переутомле́ние отозвало́сь на его́ здоро́вье** үтә арыу уның һаулығына тәьҫир итте **3.** *о ком-чём* (*высказаться*) ҡарашты (фекерҙе) әйтеү, баһа биреү, баһалау; **отозва́ться о кни́ге** китап тураһында фекер әйтеү

**ОТОЙТИ́** *сов.* **1.** китеү, ситкә китеү; **отойти́ от крыльца́** тупһанан ситкә китеү **2.** (*о средствах передвижения*) китеү; **по́езд отошёл в четы́ре часа́** поезд сәғәт дүрттә китте **3.** *от чего*; *перен.* (*отклониться*) ситкә китеү (тайпылыу), кире ҡайтыу; **отойти́ от те́мы** теманан ситкә китеү; **отойти́ от оригина́ла** оригиналдан ситкә тайпылыу **4.** *от кого-чего* (*отдалиться*) ситләшеү, алыҫлашыу, йыраҡлашыу; **отойти́ от де́ла** эштән

ситләшеү **5.** (*отделиться*) ҡубыу, ҡубып төшөү, айырылыу, айырылып сығыу; **штукату́рка отошла́** штукатурка ҡубып төшкән **6.** (*исчезнуть*) бөтөү, юҡ булыу, юҡҡа сығыу; **пятно́ отошло́** тап бөттө **7.** (*прийти в обычное состояние*) яҙылыу, йылыныу, йылы кереү, йылы тоя (һиҙә) башлау, баҫылыу, тынысланыу; **земля́ отошла́** ер йылынды; **оте́ц отошёл** атай тынысланды **8.** тейеү, күсеү; **состоя́ние отошло́ в чужи́е ру́ки** мөлкәт сит ҡулдарға күсте **9.** үтеү, бөтөү; **мо́да отошла́** мода үтте ♦ **отойти́ в ве́чность**: 1) үтеү, үлеү; 2) үтеү, эҙһеҙ юғалыу; **отойти́ в про́шлое** онотолоу; **отойти́ ко сну** йоҡоға китеү

**ОТОЛАРИНГО́ЛОГ** *м* отоларинголог (*ҡолаҡ, тамаҡ, танау ауырыуҙары табибы*)

**ОТОМКНУ́ТЬ** *сов. что; разг.* асыу, ысҡындырыу; **отомкну́ть замо́к** йоҙаҡты асыу

**ОТОМКНУ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* асылыу, ысҡыныу

**ОТОМСТИ́ТЬ** *сов.* үс алыу (ҡайтарыу), ҡон ҡайтарыу

**ОТОПИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое йылытыу ...ы, яғыу ...ы; **отопи́тельная систе́ма** йылытыу системаһы; **отопи́тельный сезо́н** яғыу мәле (сезоны)

**ОТОПИ́ТЬ** *сов. что* йылытыу, яғып йылытыу

**ОТОПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отопи́ть** **2.** йылытыу, яғыу, яғып йылытыу; **парово́е отопле́ние** пар менән йылытыу

**ОТОРА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **оторочи́ть**

**ОТО́РВАННОСТЬ** *ж* (*отчуждённость*) айырылғанлыҡ, бәйләнеш юҡлыҡ

**ОТОРВА́ТЬ** *сов.* **1.** *что* өҙөү, өҙөп алыу, йыртып алыу; **оторва́ть ни́тку** епте өҙөп алыу; **оторва́ть лист бума́ги** бер бит ҡағыҙ йыртып алыу **2.** *кого-что* алыу, алып ташлау **3.** *кого-что; перен.* айырыу, алыу, бүлеү; **оторва́ть глаза́ от кни́ги** китаптан күҙҙе алыу; **оторва́ть мы́сли** фекерҙе бүлеү **4.** *кого* (*разлучить*) айырыу; **оторва́ть ребёнка от ма́тери** баланы әсәһенән айырыу ♦ **оторва́ть от себя́** үҙенән өҙөп, икенсе кешегә биреү

**ОТОРВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от кого-чего* өҙөлөү, өҙөлөп төшөү, өҙөлөп (йыртылып) сығыу, (бәйҙән) ысҡыныу; **рука́в фуфа́йки оторва́лся** фуфайканың (һырманың) еңе өҙөлөп сыҡты **2.** *от чего* күтәрелеү, күтәрелеп китеү; **самолёт оторва́лся от земли́** самолёт ерҙән күтәрелде **3.** *от кого-чего* алыҫлашыу, артта ҡалдырыу; **оторва́ться от проти́вника** дошмандан алыҫлашыу **4.** *от кого-чего; перен.* айырылыу, ситләшеү; **оторва́ться от друзе́й** дуҫтарҙан айырылыу **5.** *от чего* айырылыу, бүленеү, туҡтап тороу, туҡтау; **оторва́ться от рабо́ты** эштән туҡтау **6.** *от кого-чего* күҙҙе алыу

**ОТОРОПЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое *разг.* аптыраған, ҡаушаған, ҡаушап (аптырап, юғалып) ҡалған; **оторопе́лый вид** аптыраған ҡиәфәт

**ОТОРОПЕ́ТЬ** *сов.; разг.* аптырау, ҡаушау, аптырап (ҡаушап, юғалып) ҡалыу

**О́ТОРОПЬ** *ж; разг.* аптырау, ҡаушау; **наводи́ть о́торопь** ҡаушау һалыу, ҡаушатыу

**ОТОРОЧИ́ТЬ** *сов. что* әҙепләү, ҡырпыулау, ҡаймалау, ҡырпыу (ҡайма, таҫма) тотоу; **оторочи́ть костю́м ме́хом** костюмды тире менән ҡырпыулау

**ОТОРО́ЧКА** *ж* (*из меха*) ҡырпыу; (*из ткани*) әҙеп, ҡайма, таҫма

**ОТОСЛА́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ебәреү; **отосла́ть письмо́** хат ебәреү **2.** (*велеть уйти*) ебәреү, сығырға ҡушыу, сығарып ебәреү; **отосла́ть маши́ну** машина ебәреү **3.** (*предложить обратиться куда-л.*) күрһәтеү, тоҫҡау, кәңәш биреү

**ОТОСПА́ТЬСЯ** *сов.* туйғансы йоҡлау, йоҡо туйҙырыу, йоҡо туйыу

**ОТОЩА́ТЬ** *сов.; разг.* ябығыу, нык арыҡланыу, һөлдәгә тороп ҡалыу

**ОТПАДА́ТЬ** *несов.* **отпа́сть**

**ОТПА́ИВАТЬ I** *несов.* **отпои́ть**

**ОТПА́ИВАТЬ II** *несов. см.* **отпая́ть**

**ОТПА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отпая́ться** **2.** *страд. от* **отпа́ивать** II

**ОТПА́РИВАТЬ** *несов. см.* **отпа́рить**

**ОТПАРИ́РОВАТЬ** *сов. что; прям., перен.* юҡҡа сығарыу, кире ҡағыу; **отпари́ровать уда́р** һуғыуҙы кире ҡағыу; **отпари́ровать возраже́ние** әйткәнде кире ҡағыу, ҡапма-ҡаршы әйтешеү

**ОТПА́РИТЬ** *сов. что; разг.* **1.** (*отутюжить*) (еүеш сепрәк аша) үтекләү **2.** (*размягчить паром*) парлап ҡуптарып алыу

**ОТПА́РЫВАТЬ** *несов. см.* **отпоро́ть**

**ОТПА́РЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отпоро́ться** **2.** *страд. от* **отпа́рывать**

**ОТПА́СТЬ** *сов.* **1.** (*отделиться*) ҡубыу, ҡубып төшөү, өҙөлөп (ҡойолоп) төшөү **2.** *перен., книжн.* айырылыу, төшөп ҡалыу, сығыу; **отпа́сть от организа́ции** ойошманан төшөп ҡалыу **3.** (*утратить смысл*) көсөн юғалтыу, юҡҡа сығыу; **обвине́ние отпа́ло** ғәйепләү юҡҡа сыҡты **4.** (*пройти, исчезнуть*) бөтөү; **жела́ние отпа́ло** теләк бөттө

**ОТПАЯ́ТЬ** *сов. что* иретеп алыу (төшөрөү); **отпая́ть но́сик ча́йника** сәйгүндең моронон иретеп алыу

**ОТПАЯ́ТЬСЯ** *сов.* ireп төшөү (ҡубыу)

**ОТПЕВА́НИЕ** *с; церк.* йыназа, йыназа уҡыу (*христиан дине буйынса*)

**ОТПЕВА́ТЬ** *несов. см.* **отпе́ть** 2

**ОТПЕРЕ́ТЬ** *сов. что* асыу, асып ебәреү; **отпере́ть замо́к** йоҙаҡты асыу

**ОТПЕРЕ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** асылыу, асылып китеү; **дверь отперла́сь** ишек асылып китте **2.** *разг.* таныу, баш тартыу, инҡар итеү; **отпере́ться от свои́х слов** үҙ һүҙҙәреңдән баш тартыу

**ОТПЕ́ТЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **отпе́ть 2.** *прил.*; *разг.* бөткән, өмөтһөҙ, сигенән сыҡҡан; **отпе́тый челове́к** бөткән кеше

**ОТПЕ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*кончить петь*) йырлап (һайрап, ҡысҡырып) туҡтау, йырлап (һайрап) бөтөү **2.** *кого*; *церк.* йыназа уҡыу

**ОТПЕЧА́ТАТЬ** *сов. что* **1.** (*закончить печатание*) баҫтырып бөтөрөү (сығарыу) **2.** *фото.* фотокарточка эшләү **3.** (*оставить отпечаток*) эҙ ҡалдырыу **4.** *что* (*сняв печать, открыть*) мисәтен алып (ватып) асыу; **отпеча́тать кабине́т** кабинетты мисәтен алып асыу

**ОТПЕЧА́ТАТЬСЯ** *сов.* эҙ ҡалыу; **на доро́ге отпеча́тались следы́** *чьи-л. кемдеңдер* юлда аяҡ эҙҙәре ҡалған

**ОТПЕЧА́ТОК** *м* **1.** эҙ; **отпеча́тки па́льцев** бармаҡ эҙҙәре **2.** *чего*; *перен.* эҙ, әҫәр, йоғонто, тәьҫир; **накла́дывать отпеча́ток** йоғонто яһау; **отпеча́ток забро́шенности** ташландыҡ (ташланғанлыҡ) эҙе

**ОТПЕЧА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **отпеча́тать**

**ОТПЕЧА́ТЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отпеча́таться 2.** *страд. от* **отпеча́тывать**

**ОТПИВА́ТЬ** *несов. см.* **отпи́ть**

**ОТПИ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **отпили́ть**

**ОТПИЛИ́ТЬ** *сов. что* бысып алыу (төшөрөү, ташлау)

**ОТПИРА́ТЕЛЬСТВО** *с* таныу, баш тартыу, инҡар итеү, кире ҡағыу

**ОТПИРА́ТЬ** *несов. см.* **отпере́ть**

**ОТПИРА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отпере́ться 2.** *страд. от* **отпира́ть**

**ОТПИСА́ТЬ** *сов. что*; *уст.* **1.** (*завещать*) мираҫ итеп ҡалдырыу, васыят итеү **2.** (*отобрать*) тартып алыу, алыу; **отписа́ть име́ние в казну́** имениены ҡаҙнаға алыу

**ОТПИСА́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* формаль яуап яҙыу

**ОТПИ́СКА** *ж* формаль яуап

**ОТПИ́СЫВАТЬ** *несов. см.* **отписа́ть**

**ОТПИ́СЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отписа́ться 2.** *страд. от* **отпи́сывать**

**ОТПИ́ТЬ** *сов. что*, *чего* (*выпить немного*) әҙ генә эсеү, бер аҙ эсеп алыу

**ОТПИ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **отпихну́ть**

**ОТПИ́ХИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отпихну́ться 2.** *страд. от* **отпи́хивать**

**ОТПИХНУ́ТЬ** *сов. кого-что*; *разг.* этеү, этәреү, этеп (этәреп) ебәреү, төртөп ебәреү; **отпихну́ть ло́дку от бе́рега** кәмәне ярҙан этеп ебәреү

**ОТПИХНУ́ТЬСЯ** *сов. разг.* этелеү, этәрелеү, этәрелеп китеү; **отпихну́ться весло́м** ишкәк менән этәрелеп китеү

**ОТПЛА́ТА** *ж см.* **отплати́ть**

**ОТПЛАТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кому*, *чем* яуап ҡайтарыу (биреү), түләү; **отплати́ть добро́м за добро́** яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап ҡайтарыу **2.** *кому* (*отомстить*) үс алыу, үс ҡайтарыу ♦ **отплати́ть той же моне́той** ашҡа аш, ташҡа таш менән ҡайтарыу; шундай уҡ яуап ҡайтарыу

**ОТПЛА́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **отплати́ть**

**ОТПЛЁВЫВАТЬ** *несов. см.* **отплю́нуть**

**ОТПЛЁВЫВАТЬСЯ** *несов.*; *разг.* **1.** төкөрөнөү **2.** *страд. от* **отплёвывать**

**ОТПЛЁСКИВАТЬ** *несов. см.* **отплесну́ть**

**ОТПЛЕСНУ́ТЬ** *сов.* **1.** (*откатиться назад — о воде, волне*) кире китеү, сигенеү, кире сәсрәү **2.** *что*, *чего*; *разг.* (*плеснув, отлить*) түгә төшөү, түгеп кәметә төшөү, түгеп кәметеү

**ОТПЛЫВА́ТЬ** *несов. см.* **отплы́ть**

**ОТПЛЫ́ТИЕ** *с* йөҙөп китеү, китеү, ҡуҙғалып китеү; **отплы́тие корабля́** караптың ҡуҙғалып китеүе

**ОТПЛЫ́ТЬ** *сов.* **1.** йөҙөп китеү, китеү; **отплы́ть от бе́рега** ярҙан йөҙөп китеү **2.** (*о судах*) китеү, ҡуҙғалып китеү; **кора́бль отплы́л но́чью** карап төндә ҡуҙғалып киткән

**ОТПЛЮ́НУТЬ** *сов. что* и *без доп.*; *разг.* төкөрөү

**ОТПЛЯСА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* (*сплясать*) бейеп алыу **2.** *без доп.* (*кончить плясать*) бейеүҙән туҡтау, бейеп туҡтау **3.** *что* (*утомить пляской*) бейеп арытыу, талдырыу; **отпляса́ть все но́ги** бейеп аяҡтарҙы талдырыу

**ОТПЛЯ́СЫВАТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отпляса́ть** 3; **2.** *разг.* (бик бирелеп, дәртләнеп) бейеү

**О́ТПОВЕДЬ** *ж* шелтәле яуап, ҡырҡа яуап; **дать ре́зкую о́тповедь** ҡырҡа яуап биреү

**ОТПОИ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** (*кончить поить*) эсереп бөтөрөү, эсереү; **отпои́ть коро́в** һыйырҙарҙы эсереү **2.** (*вырастить на жидкой пище, молоке*) имеҙеп (эсереп) үҫтереү; **отпои́ть телёнка** быҙауҙы имеҙеп үҫтереү **3.** *разг.* (*вылечить*) эсереп һауыҡтырыу (сәләмәтләндереү); **отпои́ть кумы́сом** ҡымыҙ эсереп һауыҡтырыу

**ОТПОЛА́СКИВАТЬ** *несов. см.* **отполоска́ть** 1

**ОТПОЛЗА́ТЬ** *несов. см.* **отползти́**

**ОТПОЛЗТИ́** *сов.* шыуышыу, үрмәләп (шыуышып) китеү

**ОТПОЛИРОВА́ТЬ** *сов. что* ялтыратыу, ялтыратып сығыу, шымартыу

**ОТПОЛИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **отполирова́ть**

**ОТПОЛОСКА́ТЬ** *сов.*; *разг.* **1.** *что* сайҡап алыу, сайҡау **2.** *что* и *без доп.* (*кончить полоскать*) сайҡап бөтөрөү (бөтөү)

**ОТПО́Р** *м* отпор, кире ҡағыу; **дать отпо́р агре́ссорам** агрессорҙарға отпор биреү

**ОТПОРО́ТЬ** *сов. что* һүтеү, һүтеп алыу (ташлау); **отпоро́ть рука́в** еңде һүтеп алыу

**ОТПОРО́ТЬСЯ** *сов.* һүтелеү, һүтелеп сығыу (төшөү)

**ОТПОТЕВА́ТЬ** *несов. см.* **отпоте́ть**

**ОТПОТЕ́ТЬ** *сов.*; *разг.* быуланыу, парланыу, тирләү; **стекло́ отпоте́ло** быяла быуланған

**ОТПОЧКОВА́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *биол.* бөрөнән үрсеп китеү, бөрөләнеп айырылып сығыу **2.** *перен.* бер бөтөндән айырылып яһалыу (сығыу)

**ОТПОЧКО́ВЫВАТЬСЯ** *несов. см.* **отпочкова́ться**

**ОТПРАВИ́ТЕЛЬ** *м* и **ОТПРАВИ́ТЕЛЬНИЦА** *ж* ебәреүсе, оҙатыусы; **отправи́тель гру́за** йөк ебәреүсе

**ОТПРА́ВИТЬ** *сов. кого-что* ебәреү, һалыу, оҙатыу; **отпра́вить кни́ги по́чтой** почта аша китап һалыу; **отпра́вить теплохо́д** теплоход ебәреү ♦ **отпра́вить в рот** ауыҙға һалыу; **отпра́вить на тот свет** теге донъяға оҙатыу

**ОТПРА́ВИТЬСЯ** *сов.* **1.** китеү, китеп барыу, сығыу; **отпра́виться в путь** юлға сығыу **2.** ҡуҙғалып китеү; **по́езд уже́ отпра́вился** поезд ҡуҙғалып киткән инде ♦ **отпра́виться на тот свет** теге донъяға китеү (*үлеү*)

**ОТПРА́ВКА** *ж см.* **отпра́вить** – **отправля́ть** 1, **отпра́виться**; **отпра́вка гру́за** йөк ебәреү

**ОТПРАВЛЕ́НИЕ I** *с* **1.** *см.* **отпра́вить**, **отпра́виться**; **отправле́ние по́езда** поездың ҡуҙғалып китеүе **2.** (*почтовое*) ебәрелгән әйбер; **заказно́е отправле́ние** заказ менән ебәрелгән нәмә

**ОТПРАВЛЕ́НИЕ II** *с* эшмәкәрлек; **есте́ственное отправле́ние органи́зма** организмдың тәбиғи эшмәкәрлеге

**ОТПРАВЛЯ́ТЬ** *несов.* **1.** *см.* **отпра́вить** **2.** *что*; *офиц.* (*выполнять, осуществлять*) башҡарыу, алып барыу, үтәү; **отправля́ть обя́занности секретаря́** секретарлыҡ вазифаһын үтәү

**ОТПРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отпра́виться** **2.** *от чего*; *перен.* (*исходить*) -дан/-дән сығып эш итеү, -ға/-гә таянып эшләү (эш итеү); **отправля́ться от прове́ренных да́нных** тикшерелгән мәғлүмәттәргә таянып эш итеү **3.** *страд. от* **отправля́ть**

**ОТПРАВНО́Й,** -ая, -ое **1.** ебәреү (оҙатыу, китеү) ...ы; **отправно́й пункт гру́за** йөк ебәреү пункты **2.** нигеҙ итеп алынған, башланғыс; **отправна́я мысль** нигеҙ итеп алынған фекер

**ОТПРА́ЗДНОВАТЬ** *сов.* **1.** *что* байрам итеү (үткәреү) **2.** *разг.* (*кончить праздновать*) байрам итеп бөтөү

**ОТПРА́ШИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отпроси́ться**

**ОТПРОСИ́ТЬСЯ** *сов.* рөхсәт алып (һорап) китеү; **отпроси́ться с рабо́ты** эштән һорап китеү

**ОТПРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **отпры́гнуть**

**ОТПРЫ́ГНУТЬ** *сов.* **1.** һикереү, ырғыу, һикереп (ырғып) китеү; **отпры́гнуть в сто́рону** ситкә һикереү **2.** ҡаҡлығыу, ҡаҡсыу, ҡаҡлығып (ҡаҡсып) китеү; **мяч отпры́гнул от стены́** туп стенанан ҡаҡлығып китте

**О́ТПРЫСК** *м* **1.** *бот.* үҫенте, үренте **2.** *перен., ирон.* (*потомок*) нәҫел, тоҡом

**ОТПРЯГА́ТЬ** *несов. см.* **отпря́чь**

**ОТПРЯ́НУТЬ** *сов.* тайпылыу, ялтаныу, артҡа (ситкә) һикереү; **отпря́нуть от окна́** тәҙрәнән ситкә һикереү

**ОТПРЯ́ЧЬ** *сов. кого-что* туғарыу; **отпря́чь ло́шадь** ат(ты) туғарыу

**ОТПРЯ́ЧЬСЯ** *сов.* туғарылыу

**ОТПУ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **отпугну́ть**

**ОТПУГНУ́ТЬ** *сов. кого-что* **1.** ҡурҡытыу, ҡурҡытып ебәреү, өркөтөү; **отпугну́ть воро́ну** ҡарғаны ҡурҡытып ебәреү **2.** *перен.* ҡурҡытыу, (үҙеңдән) ситләштереү

**О́ТПУСК** *м* **1.** *см.* **отпусти́ть** 1, 4, 7, 8, 10, 11; **о́тпуск това́ров** тауарҙар ебәреү **2.** ял, отпуск; **очередно́й о́тпуск** сираттағы ял **3.** *тех.* ҡайтарыу; **о́тпуск ста́ли** ҡоросто ҡайтарыу (*ҡоросто эшкәртеп ватылыусанлығын кәметеү*)

**ОТПУСКА́ТЬ** *несов. см.* **отпусти́ть**

**ОТПУСКНИ́К** *м* отпускылағы кеше, ялдағы (ялға сығыусы) ир-ат; **отпускни́ца** *ж* отпускылағы кеше, ялдағы (ялға сығыусы) ҡатын-ҡыҙ

**ОТПУСКНО́Й,** -ая, -ое **1.** ял ...ы, отпуск ...ы; **отпускно́е вре́мя** ял ваҡыты **2.** *в знач. сущ.* **отпускны́е** *мн.* (*деньги*) отпуск аҡсаһы **3.** *эк.* (*о ценах*) һатыу ...ы; **отпускны́е це́ны на това́ры** тауарҙың һатыу хаҡы

**ОТПУСТИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*разрешить идти*) ебәреү, ҡайтарыу, китергә (ҡайтырға) рөхсәт итеү; **отпусти́ть рабо́чих** эшселәрҙе ҡайтарыу **2.** *кого-что* (*освободить*) сығарып ебәреү, ебәреү, азат итеү; **отпусти́ть пти́чку из кле́тки** ҡошто ситлектән сығарып ебәреү **3.** *что* (*перестать держать*) ысҡындырыу; **отпусти́ть ру́ку** ҡулды ысҡындырыу **4.** *что* (*ослабить*) бушатыу, бушата төшөү; **отпусти́ть реме́нь** ҡайышты бушатыу **5.** *безл.* (*о боли*) ебәреү, кәмеү, әҙәйеү; **го́лову отпусти́ло** башты ебәрҙе **6.** *что* үҫтереү, еткереү, ебәреү; **отпусти́ть усы́** мыйыҡ ебәреү **7.** *что* (*выдать*) ебәреү, һатыу; **отпусти́ть това́р** тауар ебәреү **8.** *что* (*ассигновать, предоставить*) ебәреү, биреү; **отпусти́ть сре́дства на образова́ние** мәғарифҡа аҡса биреү **9.** *что*; *разг.* ысҡындырыу, әйтеп һалыу; **отпусти́ть шу́тку** шаян һүҙҙәр ысҡындырыу **10.** *что* ярлыҡау, кисереү, ғәфү итеү; **отпусти́ть грехи́** гөнаһтарҙы ярлыҡау **11.** *что*; *спец.* (*наточить*) тапау, үткерләү; **отпусти́ть ко́су** салғы тапау **12.** *что*; *тех.* ҡайтарыу; **отпусти́ть сталь** ҡоросто ҡайтарыу

**ОТПУЩЕ́НИЕ** *с* ярлыҡау, ғәфү итеү, кисереү; **отпуще́ние вины́** ғәйепте кисереү ♦ **козёл отпуще́ния** ғәйепһеҙҙән-ғәйепле, башҡаларҙың ғәйебе япһарылған кеше

**ОТРАБА́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **отрабо́тать**

**ОТРАБО́ТАННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **отрабо́тать** **2.** *прил.* (*использованный*) файҙаланылған, ҡулланылған; **отрабо́танный пар** файҙаланылған пар

**ОТРАБО́ТАТЬ** *сов.* **1.** *что* и *без доп.* (*возместить трудом*) эшләп түләү, (бурысты) эш менән түләү **2.** *что* (*проработать какое-л. время*) эшләү, эшләп үткәреү **3.** *без доп.*; *разг.* (*кончить работать*) эште бөтөрөү, эштән туҡтау; **я отрабо́тал** мин эште бөтөрҙөм **4.** *что* и *без доп.*; *перен.*, *разг.* (*износиться*) эштән сығыу, яраҡһыҙланыу, туҙыу **5.** *что* эшкәртеп (эшләп) еткереү (бөтөү); **отрабо́тать пье́су** пьесаны эшләп бөтөү **6.** *что* (яҡшы итеп) өйрәнеү, үҙләштереү; **отрабо́тать поворо́ты** боролмаларҙы яҡшы итеп өйрәнеү

**ОТРАБО́ТКА** *ж* **1.** *см.* **отрабо́тать** 1, 5, 6; **2.** *мн.* **отрабо́тки**; *ист.* эшләп ҡайтарыу (*крәҫтиәндәрҙең ҡуртымға алынған ер, бурыс һ.б. өсөн алпауытҡа йәки кулакка эшләүе*)

**ОТРА́ВА** *ж* ағыу, зәһәр

**ОТРАВИ́ТЕЛЬ** *м* ағыулаусы

**ОТРАВИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* ағыулау, ағыулап үлтереү **2.** *что* (*примешать отраву*) ағыулау, ағыу һалыу, ағыу ҡушыу; **отрави́ть мышьяко́м** мышаяҡ менән ағыулау **3.** *кого-что*; *перен.* ағыулау, зарарлау, томалау; **отрави́ть созна́ние** *чьё-л. кемдеңдер* аңын томалау **4.** *что*; *перен.* боҙоу, йәмен (хозурын) ебәреү; **отрави́ть хоро́шее настрое́ние** яҡшы кәйефте боҙоу

**ОТРАВИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*принять яд*) ағыу эсеү, ағыу эсеп үлеү **2.** ағыуланыу; **отрави́ться га́зом** газ менән ағыуланыу

**ОТРАВЛЕ́НИЕ** *с см.* **отрави́ть** 1—3 — **отравля́ть**, **отрави́ться** — **отравля́ться**

**ОТРАВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отрави́ть**

**ОТРАВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отрави́ться** **2.** *страд. от* **отравля́ть**

**ОТРАВЛЯ́ЮЩИЙ,** -ая, -ее *прич. от* **отравля́ть** ♦ **отравля́ющие вещества́** ағыулай торған матдәләр

**ОТРА́ДА** *ж* ҡыуаныс, шатлыҡ, һөйөнөс, кинәнес

**ОТРА́ДНЫЙ,** -ая, -ое ҡыуаныслы, шатлыҡлы, һөйөнөслө, кинәнесле; **отра́дное явле́ние** ҡыуаныслы хәл

**ОТРАЖА́ТЕЛЬ** *м*; *тех.* ҡайтарғыс, сағылдырғыс (*прибор*); **зерка́льный отража́тель** көҙгөлө сағылдырғыс

**ОТРАЖА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *спец.* **1.** ҡайтарыу ...ы, сағылдырыу ...ы, ҡайтарғыс, сағылдырғыс; **отража́тельная спосо́бность** сағылдырыу һәләте **2.** ҡайтара (сағылдыра) торған; **отража́тельный инструме́нт** сағылдыра торған ҡорамал

**ОТРАЖА́ТЬ** *несов. см.* **отрази́ть**

**ОТРАЖА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отрази́ться** **2.** *страд. от* **отража́ть**

**ОТРАЖЕ́НИЕ** *с* **1. отрази́ть** — **отража́ть**, **отрази́ться**; **отраже́ние зву́ка** тауыштың яңғырап кире ҡайтыуы **2.** сағылыу, кәүҙәләнеү, сағылыш, кәүҙәләнеш, сағылдырыу, кәүҙәләндереү; **отраже́ние жи́зни в иску́сстве** сәнғәттә тормоштоң кәүҙәләнеүе; **отраже́ние эпо́хи** дәүер(ҙең) сағылышы

**ОТРАЗИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что*; *в разн. знач.* кире ҡағыу, кире ҡайтарыу; **отрази́ть ата́ку** һөжүмде кире ҡағыу (ҡайтарыу); **отрази́ть обвине́ние** ғәйепләүҙе кире ҡағыу **2.** *что* (*о гладкой поверхности*) сағылдырыу, күрһәтеү **3.** *кого-что* кәүҙәләндереү, сағылдырыу, һүрәтләү, тасуирлау; **отрази́ть действи́тельность** ысынбарлыҡты сағылдырыу

**ОТРАЗИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** сағылыу; **в воде́ отрази́лся лу́нный свет** һыуҙа ай яҡтыһы сағылды **2.** күренеү, сағылыу; **на его́ лице́ отрази́лось удово́льствие** уның йөҙөндә ҡәнәғәтләнеү сағылды **3.** *на ком-чём* тәьҫир итеү, йоғонто яһау; **отрази́ться на здоро́вье** сәләмәтлеккә тәьҫир итеү **4.** сағылыу; **в рома́не отрази́лись впечатле́ния де́тства** романда балалыҡ тәьҫораттары сағылған

**ОТРАПОРТОВА́ТЬ** *сов. о чём* рапорт биреү

**ОТРАСЛЕВО́Й,** -ая, -ое тармаҡ ...ы, тармаҡ буйынса ...ы; **отраслево́е совеща́ние** тармаҡ буйынса кәңәшмә

**О́ТРАСЛЬ** *ж* **1.** тармаҡ; **важне́йшие о́трасли наро́дного хозя́йства** халыҡ хужалығының мөһим тармаҡтары **2.** *уст.* йәш үҫенте **3.** *уст.* нәҫел, нәҫел тармағы, тоҡом **4.** *уст.* тау тармағы

**ОТРАСТА́ТЬ** *несов. см.* **отрасти́**

**ОТРАСТИ́** *сов.* үҫеү, үҫеп етеү

**ОТРАСТИ́ТЬ** *сов. что* үҫтереү, ебәреү, еткереү; **отрасти́ть бо́роду** һаҡал үҫтереү; **отрасти́ть но́гти** тырнаҡ еткереү

**ОТРА́ЩИВАТЬ** *несов. см.* **отрасти́ть**

**ОТРЕ́БЬЕ** *с собир.* **1.** *уст.* (*отбросы*) ҡалдыҡ-боҫтоҡ, ташландыҡ **2.** *перен.* әҙәм аҡтыҡтары, ҡәбәхәттәр; **фаши́стское отре́бье** фашист ҡәбәхәттәре

**ОТРЕГУЛИ́РОВАТЬ** *сов. что* рәтләү, рәтләп ебәреү, ипкә килтереү, ипләү, көйләү, яйға һалыу; **отрегули́ровать тормоза́** тормозды рәтләп ебәреү

**ОТРЕДАКТИ́РОВАТЬ** *сов. что* редакторлау, редакторлап сығыу

**ОТРЕ́З** *м* **1.** *см.* **отре́зать** 1, 2 — **отреза́ть** **2.** киҫәк, тауар; **отре́з на пла́тье** күлдәклек тауар **3.** *спец.* (*срез*) киҫем, киҫелеш, киҫелгән урын

**ОТРЕ́ЗАТЬ** *сов.* **1.** *что, чего* (*разрезать*) ҡырҡыу, ҡырҡып алыу **2.** *что, чего* (*отделить межеванием*) ҡырҡып (бүлеп) биреү, ер бүлеү **3.** *кого-что*; *перен.* ябыу, ҡалдырмау, бүлеү; **отре́зать путь к отступле́нию** сигенеү юлын ябыу **4.** *что*; *спец.* (*отпилить*) ҡырҡып төшөрөү; **отре́зать до́ску** таҡтаны ҡырҡып төшөрөү **5.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*резко ответить*) ҡырт киҫеү, ҡырҡа яуап биреү

**ОТРЕЗА́ТЬ** *несов. см.* **отре́зать**

**ОТРЕЗВЕ́ТЬ** *сов*; *прям.*, *перен.* айныу, айнығыу

**ОТРЕЗВИ́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое айныткыс, айныта торған; **отрезви́тельный напи́ток** айныта торған эсемлек

**ОТРЕЗВИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *прям.*, *перен.* айнытыу, айныктырыу; **кри́тика отрезви́ла его́** тәнҡит уны айнытты

**ОТРЕЗВИ́ТЬСЯ** *сов.*; *прям.*, *перен.* айныу, айнығыу

**ОТРЕЗВЛЕ́НИЕ** *с см.* **отрезви́ть — отрезвля́ть, отрезви́ться**

**ОТРЕЗВЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отрезви́ть**

**ОТРЕЗВЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отрезви́ться 2.** *страд. от* **отрезвля́ть**

**ОТРЕЗНО́Й,** -ая, -ое **1.** киҫмә, киҫелмә; **отрезно́й тало́н** киҫмә талон **2.** киҫелмәле, билле; **пла́тье с отрезно́й та́лией** билле күлдәк **3.** киҫкес, киҫә торған; **отрезно́й стано́к** киҫкес станок

**ОТРЕ́ЗОК** *м* **1.** (*небольшой отрезанный кусок чего-л.*) киҫәк, ҡырҡым, ҡырҡынды **2.** (*часть чего-л. целого*) өлөш, арауыҡ, ара; **отре́зок вре́мени** ваҡыт арауығы; **отре́зок доро́ги** юлдың бер өлөшө **3.** *мат.* киҫем **4.** *мн.* **отре́зки**; *ист.* киҫенте

**ОТРЕКА́ТЬСЯ** *несов. см.* **отре́чься**

**ОТРЕКОМЕНДОВА́ТЬ** *сов. см.* **рекомендова́ть**

**ОТРЕКОМЕНДОВА́ТЬСЯ** *сов.* исемен әйтеү, танышыу

**ОТРЕМОНТИ́РОВАТЬ** *сов. что* ремонтлау, ремонт яһау (үткәреү), ремонтлап бөтөрөү, төҙәтеү

**ОТРЕПЕТИ́РОВАТЬ** *сов. что* өйрәнеү, өйрәнеп алыу, репетиция яһау; **отрепети́ровать роль** ролде (репетиция яһап) өйрәнеү

**ОТРЕ́ПЬЕ** *с собир.* и **ОТРЕ́ПЬЯ** *мн.*; *разг.* (*лохмотья*) иҫке-моҫҡо, сепрәк-сапраҡ, аламһолам

**ОТРЕЧЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отре́чься — отрека́ться 2.** (*документ*) ваз кисеү (баш тартыу) ҡағыҙы (*үҙенең хоҡуҡтарынан*)

**ОТРЕ́ЧЬСЯ** *сов. от кого-чего* (*отказаться*) ваз кисеү, баш тартыу, таныу; **отре́чься от своего́ произведе́ния** үҙ әҫәренән баш тартыу ♦ **отре́чься от престо́ла** тәхеттән баш тартыу

**ОТРЕША́ТЬ** *несов. см.* **отреши́ть**

**ОТРЕША́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отреши́ться 2.** *страд. от* **отреша́ть**

**ОТРЕШЁННОСТЬ** *ж* битарафлыҡ, ситләшкәнлек; **отрешённость от окружа́ющего ми́ра** тирә-яҡ мөхиттән ситләшкәнлек

**ОТРЕШЁННЫЙ,** -ая, -ое **1.** *прич. от* **отреши́ть 2.** *прил.* битараф, ситләшкән; **отрешённый взгляд** битараф ҡараш

**ОТРЕШИ́ТЬ** *сов. кого*; *уст.* урынынан сығарыу, бушатыу; **отреши́ть от до́лжности** вазифанан бушатыу

**ОТРЕШИ́ТЬСЯ** *сов.*; *книжн.* (*отказаться, освободиться*) ҡотолоу, ваз кисеү

**ОТРИЦА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отрица́ть 2.** *филос.* инҡар, инҡар итеү **3.** *грам.* юҡлыҡ; **фо́рмы отрица́ния** юҡлыҡ формалары

**ОТРИЦА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое **1.** кире, тиҫкәре, ҡаршы; **отрица́тельный отве́т** кире яуап **2.** *мат.* тиҫкәре; **отрица́тельное число́** тиҫкәре һан **3.** *физ.* кире; **отрица́тельный заря́д** кире заряд **4.** насар; **отрица́тельная характери́стика** насар характеристика (ҡылыҡһыр) **5.** (*исходящий из отрицания чего-л.*) инҡар итеүгә ҡоролған; **отрица́тельный ме́тод** инҡар итеүгә ҡоролған ысул

**ОТРИЦА́ТЬ** *несов.* **1.** *что* и *без доп.* (*не соглашаться с чем-л.*) иҫәпләшмәү, иҫәпкә алмау **2.** *что* (*отвергать*) инҡар итеү, танымау, кире ҡағыу; **отрица́ть успе́хи** *чьи-л.* *берәйһенең* уңыштарын инҡар итеү

**ОТРО́Г** *м*; *геогр.* армыт; **отро́ги гор** тау армыттары

**О́ТРОДУ** *нареч.*; *разг.* һис бер, ғүмерҙә, бер ваҡытта ла, һис бер ваҡытта, һис ҡасан да; **о́троду здесь не быва́л** ғүмерҙә бында булғаным юҡ

**ОТРО́ДЬЕ** *с* **1.** *разг.* (*с оттенком пренебрежения*) тыумаса, быуын, нәҫел-нәсәп **2.** (*бранное слово*) шайтан заты, әҙәм аҡтығы **3.** *с.-х.* тоҡом төрө

**ОТРО́ЕК** *м*; *пчел.* бала күс, яңы күс

**ОТРОИ́ТЬ** *сов. кого-что*; *пчел.* күс айырыу

**ОТРОИ́ТЬСЯ** *сов.*; *пчел.* күс айырылып сығыу

**О́ТРОК** *м*; *уст.* йәш үҫмер

**ОТРО́СТОК** *м* **1.** *бот.* (*молодой побег*) үренде, үҫенте **2.** *анат.* үҫенте; **отро́сток слепо́й кишки́** һуҡыр эсәк үҫентеһе

**О́ТРОЧЕСКИЙ,** -ая, -ое йәш үҫмер ...ы, үҫмерлек ...ы, үҫмер саҡ ...ы; **о́троческие го́ды** үҫмерлек йылдары

**О́ТРОЧЕСТВО** *с*; *книжн.* үҫмерлек, үҫмерлек осоро, үҫмер саҡ

**О́ТРУБ** *м*; *ист.* отруб (*Рәсәйҙә 1906—16 йй. йәмғәт еренән крәҫтиәндәргә общинанан сыҡҡанда хосуси милеккә бирелгән ер*)

**ОТРУ́Б** *м* ҡырҡым (*ағастың ҡырҡылған урыны*)

**ОТРУБА́ТЬ** *несов. см.* **отруби́ть**

**О́ТРУБИ** *только мн.* көрпә, кәбәк

**ОТРУБИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* сабып өҙөү, сабып (ҡырҡып) ташлау (төшөрөү); **отруби́ть сук** ботаҡты сабып ташлау **2.** *что* и *без доп.*; *разг.* (*резко ответить*) ҡырт киҫеү, ҡырт киҫеп әйтеү, ҡырҡа яуап биреү

**ОТРУБНО́Й,** -ая, -ое *ист.* отруб ...ы; **отрубно́е хозя́йство** отруб хужалығы

**О́ТРУБНЫЙ,** -ая, -ое *с.-х.* көрпә ...ы; **о́трубный корм** көрпә аҙығы

**ОТРУГА́ТЬ** *сов. кого-что* әрләү, тиргәү, әрләп (тиргәп) ташлау

**ОТРЫ́В** *м см.* **оторва́ть** 1, 4 — **оторва́ться**; айырылыу; **отры́в от действи́тельности** ысынбарлыҡтан айырылыу ♦ **без отры́ва от произво́дства** эшләгән көйөнә, эшләп йөрөп

**ОТРЫВА́ТЬ I** *несов. см.* **оторва́ть**

**ОТРЫВА́ТЬ II** *несов. см.* **отры́ть**

**ОТРЫВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **оторва́ться** **2.** *страд. от* **отрыва́ть** I

**ОТРЫ́ВИСТОСТЬ** *ж* өҙөк-өҙөк булыу

**ОТРЫ́ВИСТЫЙ,** -ая, -ое өҙөк-өҙөк, өҙөп-өҙөп, бүлеп-бүлеп; **отры́вистый звук** өҙөк-өҙөк өн; **отры́вистая речь** өҙөп-өҙөп һөйләү

**ОТРЫВНО́Й,** -ая, -ое өҙмәле, йыртмалы; **отрывно́й тало́н** йыртмалы талон; **отрывно́й календа́рь** йыртмалы календарь

**ОТРЫ́ВОК** *м* өҙөк, өҙөмтә, өлөш; **отры́вок из рома́на** романдан өҙөк

**ОТРЫ́ВОЧНЫЙ,** -ая, -ое өҙөк-өҙөк, өҙөк-йыртыҡ, ярты-йорто, тулы булмаған, бәйләнешһеҙ; **отры́вочные све́дения** тулы булмаған мәғлүмәттәр; **отры́вочные фра́зы** өҙөк-өҙөк фразалар

**ОТРЫ́ГИВАТЬ** *несов. см.* **отрыгну́ть**

**ОТРЫ́ГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отрыгну́ться** **2.** *страд. от* **отры́гивать**

**ОТРЫГНУ́ТЬ** *сов. что, чего; разг.* кикереү, кикереп сығарыу

**ОТРЫГНУ́ТЬСЯ** *сов.; разг.* кикереп сығарылыу

**ОТРЫ́ЖКА** *ж* кикереү

**ОТРЫ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*вырыть*) ҡаҙып (соҡоп) алыу (сығарыу) **2.** *кого-что; перен., разг.* (*разыскать*) эҙләп табыу **3.** *что; воен.* ҡаҙыу; **отры́ть око́п** окоп ҡаҙыу

**ОТРЯ́Д** *м; в разн. знач.* отряд; **деса́нтный отря́д** десантсылар отряды; **гео́лого-разве́дывательный отря́д** эҙләнеүсе геологтар отряды; **отря́д грызуно́в** *зоол.* кимереүселәр отряды

**ОТРЯДИ́ТЬ** *сов. кого-что* ебәреү; **отряди́ть бойцо́в в разве́дку** һуғышсыларҙы разведкаға ебәреү

**ОТРЯ́ДНЫЙ,** -ая, -ое отряд ...ы; **отря́дный сбор** отряд йыйылышы

**ОТРЯЖА́ТЬ** *несов. см.* **отряди́ть**

**ОТРЯ́ХИВАТЬ** *несов. см.* **отряхну́ть**

**ОТРЯ́ХИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отряхну́ться** **2.** *страд. от* **отря́хивать**

**ОТРЯХНУ́ТЬ** *сов. что* ҡағыу, һелкеү, ҡағып (һелкеп) алыу (төшөрөү); **отряхну́ть пыль с плаща́** плащтың саңын ҡағыу

**ОТРЯХНУ́ТЬСЯ** *сов.* ҡағыныу, ҡағынып алыу

**ОТСАДИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*посадить отдельно*) айырым ултыртыу; **отсади́ть шалуна́** шаянды айырым ултыртыу **2.** *кого* (*животное*) айырып ҡуйыу, айырым урынлаштырыу **3.** *что* (*растение*) күсереп ултыртыу, айырып алып ултыртыу; **отсади́ть молоды́е дубки́** йәш имәндәрҙе күсереп ултыртыу

**ОТСА́ДКА** *ж см.* **отсади́ть** 2, 3

**ОТСА́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **отсади́ть**

**ОТСА́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отсе́сть**

**ОТСАЛЮТОВА́ТЬ** *сов.* салют биреү

**ОТСА́СЫВАТЬ** *несов. см.* **отсоса́ть** 1, 2

**О́ТСВЕТ** и *уст.* **ОТСВЕ́Т** *м* яҡтылыҡ сағылышы, сағылған яҡтылыҡ, ут шәүләһе; **о́тсвет луны́** айҙан сағылған яҡтылыҡ

**ОТСВЕ́ЧИВАТЬ** *несов.* яҡтылыҡ сағылдырыу, яҡты төшөү

**ОТСЕБЯ́ТИНА** *ж; разг.* **1.** (*слова*) кеше һүҙенә үҙеңдән өҫтәлгән һүҙҙәр **2.** (*поступки, действия*) үҙ белдеге менән эшләнгән эшҡылыҡ

**ОТСЕ́В** *м* **1.** *см.* **отсе́ять** 1, 2 — **отсева́ть** — **отсе́ивать**; **отсе́в уча́щихся** уҡыусыларҙың уҡыуҙан төшөп ҡалыуы **2.** (*то, что отсеяно, отсеялось*) иләк аҫты (ҡалдығы)

**ОТСЕВА́ТЬ** *несов. см.* **отсе́ять** 1

**ОТСЕВА́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отсе́яться** 1; **2.** *страд. от* **отсева́ть**

**ОТСЕ́ВКИ** *только мн.* иләк аҫты (ҡалдығы), иләктә ҡалған нәмә

**ОТСЕ́ИВАТЬ** *несов. см.* **отсе́ять** 1, 2

**ОТСЕ́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отсе́яться** 1, 2; **2.** *страд. от* **отсе́ивать**

**ОТСЕ́К** *м* бүлек, бүлмә (*самолётта, карапта һ.б.*); **отсе́к ваго́на** вагон бүлеге

**ОТСЕКА́ТЬ** *несов. см.* **отсе́чь**

**ОТСЕЛИ́ТЬ** *сов. кого-что* күсереү, күсереп ултыртыу (урынлаштырыу)

**ОТСЕЛИ́ТЬСЯ** *сов.* күсеү, күсеп ултырыу (урынлашыу)

**ОТСЕЛЯ́ТЬ** *несов. см.* **отсели́ть**

**ОТСЕЛЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отсели́ться** **2.** *страд. от* **отселя́ть**

**ОТСЕ́СТЬ** *сов.* (алыҫҡараҡ) күсеп ултырыу; **отсе́сть от окна́** тәҙрәнән алыҫҡараҡ күсеп ултырыу

**ОТСЕЧЕ́НИЕ** *с; книжн. см.* **отсе́чь** — **отсека́ть** ♦ **дать го́лову на отсече́ние** башты киҫмәгә биреү

**ОТСЕ́ЧЬ** *сов.* **1.** *что* (*отрубить*) сабып (ҡырҡып) алыу, сабып (ҡырҡып) төшөрөү **2.** *кого-что; перен.* ҡыйыу, киҫеү, бүлеп алыу, айырыу; **отсе́чь подхо́д подкрепле́ний** килеүсе өҫтәлмә көстәрҙе айырыу

**ОТСЕ́ЯТЬ** *сов.* **1.** *что* иләү, иләп айырыу; **отсе́ять сор** сүпте иләп айырыу **2.** *кого-что; перен.* һайлап алыу, иләктән үткәреү, һайлап сығарып

ташлау **3.** *что* и *без доп.*; *разг.* сәсеүҙе тамамлау, сәсеү эштәрен бөтөрөү

**ОТСЕ́ЯТЬСЯ** *сов.* **1.** иләнеү, иләнеп айырылыу; **о́труби отсе́ялись** көрпә иләнеп айырылды (алынды) **2.** *перен.* төшөп ҡалыу, тороп ҡалыу; **часть уча́щихся отсе́ялась** уҡыусыларҙың бер өлөшө төшөп ҡалған **3.** *разг.* (*окончить сев*) сәсеүҙе тамамлау

**ОТСИДЕ́ТЬ** *сов.* *что* **1.** ипһеҙ (оҙаҡ) ултырып ойотоу (талдырыу); **отсиде́ть но́гу** (ипһеҙ ултырып) аяҡты ойотоу **2.** *разг.* ултырыу, ултырып үткәреү (уҙғарыу); **отсиде́ть два часа́ в саду́** баҡсала ике сәғәт ултырыу **3.** (*отбыть срок наказания*) ултырып сығыу (*төрмәлә*)

**ОТСИДЕ́ТЬСЯ** *сов.*; *разг.* ҡасып ултырып ҡалыу, (үҙен һаҡлап) ҡасып (йәшенеп) ҡалыу; **отсиде́ться в пала́тке во вре́мя дождя́** ямғыр ваҡытында ҡасып палаткала ултырып ҡалыу

**ОТСИ́ЖИВАТЬ** *несов. см.* **отсиде́ть**

**ОТСИ́ЖИВАТЬСЯ** *несов. см.* **отсиде́ться**

**ОТСКА́БЛИВАТЬ** *несов. см.* **отскобли́ть**

**ОТСКА́БЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отскобли́ться** **2.** *страд. от* **отска́бливать**

**ОТСКАКА́ТЬ** *сов.* **1.** (*отъехать вскачь*) сабып үтеп китеү, саптырып ситкә китеү **2.** *разг.* (*кончить скакать*) сабыуҙан (сабып) туҡтау

**ОТСКА́КИВАТЬ** *несов. см.* **отскочи́ть**

**ОТСКОБЛИ́ТЬ** *сов.* *что* ҡырып алыу (ташлау, төшөрөү); **отскобли́ть кра́ску** буяуҙы ҡырып төшөрөү

**ОТСКОБЛИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡырып алыныу (төшөрөлөү)

**ОТСКОЧИ́ТЬ** *сов.* **1.** (*отодвинуться прыжком*) ситкә һикереү (ташланыу), һикереп китеү **2.** (*в обратном направлении*) ҡаҡлығыу, ҡаҡсыу; **мяч отскочи́л от стены́** туп стенанан ҡаҡлыҡты **3.** *разг.* (*оторваться*) өҙөлөп сығыу (төшөү); **пу́говица отскочи́ла** төймә өҙөлөп төштө

**ОТСКРЕБА́ТЬ** *несов. см.* **отскрести́**

**ОТСКРЕСТИ́** *сов.* *что* ҡырып алыу (төшөрөү)

**ОТСЛА́ИВАТЬ** *несов. см.* **отслои́ть**

**ОТСЛА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отслои́ться** **2.** *страд. от* **отсла́ивать**

**ОТСЛОЕ́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отслои́ть**, **отслои́ться** **2.** (*слой*) (ултырған) ҡатлам

**ОТСЛОИ́ТЬ** *сов.* *что* ҡатлау-ҡатлау итеп ҡуптарып алыу, ҡатлау-ҡатлау итеп ултыртыу; **отслои́ть кору́** ҡабыҡты ҡатлау-ҡатлау итеп ҡуптарып алыу

**ОТСЛОИ́ТЬСЯ** *сов.* ҡатлау-ҡатлау булып ҡубып төшөү, ҡатлау-ҡатлау булып төпкә ултырыу

**ОТСЛУЖИ́ТЬ** *сов.* **1.** *что* (*проработать какое-л. время*) хеҙмәт итеү, эшләү **2.** *что*; *воен.* хәрби хеҙмәтте тултырып ҡайтыу **3.** (*износиться*) иҫкереү, туҙыу, яраҡһыҙ хәлгә килеү **4.** *что*; *церк.* ғибәҙәт ҡылып бөтөү, ғибәҙәтте тамамлау

**ОТСНЯ́ТЬ** *сов.* *что*; *спец.* төшөрөү, төшөрөп (бөтөү) алыу; **отсня́ть фильм** фильм төшөрөп бөтөү

**ОТСОВЕ́ТОВАТЬ** *сов.* *кому* и *с неопр.* кәңәш биреү (*берәй нәмәне эшләмәҫкә*), кире дүндереү; **отсове́товать не е́хать в го́род** ҡалаға бармаҫҡа кәңәш биреү

**ОТСОЕДИНИ́ТЬ** *сов.* *что* өҙөү; **отсоедини́ть про́вод** үткәргесте өҙөү

**ОТСОЕДИНЯ́ТЬ** *несов. см.* **отсоедини́ть**

**ОТСОРТИРОВА́ТЬ** *сов.* *что* сорттарға айырыу (айырып ҡуйыу), һайлап алыу; **отсортирова́ть пшени́цу** бойҙайҙы сорттарға айырып ҡуйыу

**ОТСОРТИРО́ВЫВАТЬ** *несов. см.* **отсортирова́ть**

**ОТСОСА́ТЬ** *сов.* **1.** *что*, *чего* һурып (имеү) алыу (эсеү), имеп сығарыу **2.** *что*; *тех.* һурҙыртып алыу **3.** *без доп.*; *разг.* (*кончить сосать*) имеп (һурып) бөтөү, имеүҙән (һурыуҙан) туҡтау

**ОТСО́ХНУТЬ** *сов.* **1.** ҡороу, ҡурылыу; **ве́тка отсо́хла** ботаҡ ҡороған **2.** *перен.*, *разг.* (*о частях тела*) ҡороу; **рука́ отсо́хла** ҡул(ы) ҡороған

**ОТСРО́ЧИВАТЬ** *несов. см.* **отсро́чить**

**ОТСРО́ЧИТЬ** *сов.* *что* **1.** (*перенести на более поздний срок*) кисектереү; **отсро́чить сда́чу экза́менов** имтихан тапшырыуҙы кисектереү **2.** (*продлить срок*) ваҡытын оҙайтыу; **отсро́чить па́спорт** паспорттың ваҡытын оҙайтыу

**ОТСРО́ЧКА** *ж см.* **отсро́чить**; **отсро́чка отъе́зда** китеүҙе кисектереү; **отсро́чка па́спорта** паспорттың ваҡытын, йылын оҙайтыу

**ОТСТАВА́НИЕ** *с* **1.** *см.* **отстава́ть** **2.** артта ҡалыу, артта ҡалғанлыҡ; **ликвиди́ровать отстава́ние** артта ҡалыуҙы бөтөрөү

**ОТСТАВА́ТЬ** *несов. см.* **отста́ть**

**ОТСТА́ВИТЬ** *сов.* **1.** *что* (*отодвинуть*) ситкә этәреү, ситкә алып ҡуйыу; **отста́вить стул** ултырғысты ситкә этәреп ҡуйыу **2.** *кого*; *уст.* (*уволить*) (эштән) сығарыу, (хеҙмәттән) бушатыу **3.** *кого*; *уст.* (*отдалить от себя*) (үҙеңдән) ситләштереү ♦ **отста́вить!** туҡта!, туҡтағыҙ! (*бирелгән команданы "үтәмәҫкә!", "туҡтап торогоҙ!" мәғәнәһендә*)

**ОТСТА́ВКА** *ж* отставка; **вы́йти в отста́вку** отставкаға сығыу ♦ **отста́вка прави́тельства** хөкүмәттең отставкаға китеүе

**ОТСТАВЛЯ́ТЬ** *несов.* **отста́вить**

**ОТСТАВНО́Й**, -ая, -ое **1.** отставкаға сыҡҡан, отставкалағы ...ы; **отставно́й офице́р** отставкалағы офицер **2.** күсермәле, күсереп йөрөтмәле (ҡуймалы); **отставна́я ле́стница** күсермәле баҫҡыс

**ОТСТА́ИВАНИЕ I** *с см.* **отста́ивать** I; **отста́ивание свои́х прав** үҙеңдең хоҡуҡтарыңды яҡлау

**ОТСТА́ИВАНИЕ II** *с см.* **отстоя́ться**; **отста́ивание воды́** һыуҙың тоноуы

**ОТСТА́ИВАТЬ I** *несов. см.* **отстоя́ть** I

**ОТСТА́ИВАТЬ II** *несов. см.* **отстоя́ть** II

**ОТСТА́ИВАТЬСЯ** *несов.*; *разг. см.* **отстоя́ться**

**ОТСТА́ЛОСТЬ** *ж* артталыҡ, артта ҡалыу, артта ҡалғанлыҡ; **отста́лость взгля́дов** ҡараштарҙың артта ҡалғанлығы

**ОТСТА́ЛЫЙ,** -ая, -ое арттағы ...ы, артта ҡалған; **отста́лая страна́** артта ҡалған ил

**ОТСТА́ТЬ** *сов.* **1.** *от кого-чего* (*остаться позади*) артта ҡалыу **2.** *от чего* (*остаться на месте*) ҡалыу, тороп ҡалыу; **отста́ть от по́езда** поездан тороп ҡалыу **3.** (*о часах*) артҡа ҡалыу **4.** (*отделиться*) ҡубыу; **кора́ отста́ла** ҡабыҡ ҡупҡан **5.** (*перестать надоедать*) теңкәгә теййеүҙән туҡтау, бәйләнмәү, борсомау, мәшәҡәтләмәү, маҙаһыҙламау, бимазаламау; **отста́ньте от меня** мине маҙаһыҙламағыҙ

**ОТСТАЮ́ЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **отста́ть** **2.** *прил.* өлгәшмәүсе, артта ҡалыусы

**ОТСТЕГА́ТЬ** *сов. кого-что* сыбыртҡылау, һыҙырыу, ҡайыҙлау, һуҡтырыу

**ОТСТЁГИВАТЬ** *несов. см.* **отстегну́ть**

**ОТСТЁГИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отстегну́ться** **2.** *страд. от* **отстёгивать**

**ОТСТЕГНУ́ТЬ** *сов. что* сисеү, ысҡындырыу, сисеп (ысҡындырып) ебәреү

**ОТСТЕГНУ́ТЬСЯ** *сов.* сиселеү, ысҡыныу; **пу́говица отстегну́лась** төймә ысҡынған

**ОТСТИРА́ТЬ** *сов. что* йыуып таҙартыу (таҙалау, бөтөрөү); **отстира́ть бельё** керҙе йыуып таҙартыу

**ОТСТИРА́ТЬСЯ** *сов.* йыуылып таҙарыу, йыуып бөтөрөлөү; **грязь отстира́лась** бысраҡ йыуып бөтөрөлдө

**ОТСТИ́РЫВАТЬ** *несов. см.* **отстира́ть**

**ОТСТИ́РЫВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отстира́ться** **2.** *страд. от* **отсти́рывать**

**ОТСТО́Й** *м* ултырма, төпрә; **отсто́й сиро́па** сироп төпрәһе

**ОТСТО́ЙНИК** *м*; *тех.* тондороу бассейны

**ОТСТОЯ́ТЬ I** *сов. кого-что* (*защитить*) яҡлау, яҡлап ҡалыу, һаҡлап алып ҡалыу; **отстоя́ть свои́ права́** үҙ хоҡуҡтарыңды яҡлау

**ОТСТОЯ́ТЬ II** *сов. что* и *без. доп.* **1.** (*простоять до конца*) баҫып тороу (уҙғарыу); **отстоя́ть ва́хту** вахтала тороу **2.** *разг.* (*утомить ноги*) баҫып тороп (аяҡты) талдырыу

**ОТСТОЯ́ТЬ III** *несов. от кого-чего* арыраҡ (ситтәрәк) тороу (булыу), йыраҡлыҡта булыу; **дере́вня отстои́т от ста́нции на киломе́тр** ауыл станциянан бер километр йыраҡлыҡта

**ОТСТОЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** (*о жидкости*) тоноу **2.** *перен.* (*о взглядах, мнениях и т.п.*) нығыу, нығып китеү

**ОТСТРАДА́ТЬ** *сов.* ғазап сигеүҙән туҡтау, ыҙа (яфа) сигеп туҡтау, ауырлыҡты үткәреп ебәреү

**ОТСТРА́ИВАТЬ** *несов. см.* **отстро́ить**

**ОТСТРА́ИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отстро́иться** **2.** *страд. от* **отстра́ивать**

**ОТСТРАНЕ́НИЕ** *с см.* **отстрани́ть** — **отстраня́ть**, **отстрани́ться** 2; **отстране́ние от де́ла** эштән ситләштереү (бушатыу)

**ОТСТРАНИ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* (*отодвинуть*) этеү, этеп (төртөп) ебәреү **2.** *кого* (*уволить*) эштән сығарыу (алыу); **отстрани́ть от рабо́ты** эштән сығарыу

**ОТСТРАНИ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** ситкә китеү, тайпылыу, тайшаныу; **отстрани́ться от маши́ны** машинанан тайпылыу **2.** *от чего* (*уклониться*) баш тартыу, ҡыҫылмау, ҡатнашмау; **отстрани́ться от ме́лочной опе́ки** ваҡ-төйәк ҡурсалауҙан баш тартыу, ваҡ-төйәккә ҡыҫылмау

**ОТСТРАНЯ́ТЬ** *несов. см.* **отстрани́ть**

**ОТСТРАНЯ́ТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отстрани́ться** **2.** *страд. от* **отстраня́ть**

**ОТСТРЕ́Л** *м см.* **отстреля́ть** 1 — **отстре́ливать**; **разреши́ть отстре́л лосе́й** мышылар атып алыуға рөхсәт биреү

**ОТСТРЕ́ЛИВАТЬ** *несов. см.* **отстрели́ть**, **отстреля́ть** 1

**ОТСТРЕ́ЛИВАТЬСЯ** *несов.* **1.** *см.* **отстреля́ться** 1; **2.** *страд. от* **отстре́ливать**

**ОТСТРЕЛИ́ТЬ** *сов. что* (*оторвать пулей, снарядом и т.п.*) атып өҙҙөрөү; **отстрели́ть па́лец** бармаҡты атып өҙҙөрөү

**ОТСТРЕЛЯ́ТЬ** *сов.* **1.** *кого*; *охот.* аулап (атып) үлтереү, атып бөтөрөү; **отстреля́ть волко́в** бүреләрҙе аулап атып бөтөрөү **2.** (*израсходовать на стрельбу*) атып бөтөрөү; **отстреля́ть патро́нную ле́нту** патрон таҫмаһын атып бөтөрөү **3.** *разг.* атыуҙан туҡтау, атып бөтөү; **взвод отстреля́л** взвод атыуҙан туҡтаны

**ОТСТРЕЛЯ́ТЬСЯ** *сов.* **1.** *от кого-чего* (*отбиться стрельбой*) ҡаршы атышып һаҡланыу, ҡаршы атып ҡотолоу; **отстреля́ться от неприя́теля** дошманға ҡаршы атып ҡотолоу **2.** (*закончить стрельбу*) атып бөтөү, атыуҙан туҡтау

**ОТСТРИГА́ТЬ** *несов. см.* **отстри́чь**

**ОТСТРИ́ЧЬ** *сов.* ҡырҡыу, алыу, ҡырҡып (киҫеп) алыу, ҡырҡып (киҫеп) ташлау (*йөн, сәс*); **отстри́чь во́лосы** сәс ҡырҡыу

**ОТСТРОГА́ТЬ** *сов. что* **1.** (*обстрогать*) йышыу, йышып шымартыу **2.** (*снять рубанком*) йышып төшөрөү

**ОТСТРО́ИТЬ** *сов. что* **1.** (*закончить постройку*) төҙөп (һалып, ҡороп) бөтөрөү **2.** (*восстановить*) яңынан төҙөү (һалыу, ҡороу)

**ОТСТРО́ИТЬСЯ** *сов.* **1.** (*закончить постройку чего-л. для себя*) төҙөп (һалып, ҡороп) бөтөү **2.** яңынан төҙөү, яңынан һалыу (*үҙең өсөн*)

**ОТСТУ́КАТЬ** *сов. что* **1.** *разг.* таҡ-тоҡ итеү, тыҡылдау, таҡылдатыу; **отсту́кать мело́дию** таҡылдатып көй сығарыу **2.** *прост.* (*на машинке, по телеграфу*) таҡылдатып (баҫыу) баҫып алыу, тыҡылдатып алыу (ебәреү)

**ОТСТУ́КИВАТЬ** *несов. см.* **отсту́кать**

**О́ТСТУП** *м*; *полигр.* буш урын, ара, аралыҡ (*тексты башлап китер алдынан буш ҡалдырылған урын*)

**ОТСТУПА́ТЕЛЬНЫЙ,** -ая, -ое *воен.* сигенеү ...ы; **отступа́тельный манёвр** сигенеү манёвры

**ОТСТУПА́ТЬ** *несов. см.* **отступи́ть**

**ОТСТУПА́ТЬСЯ** *несов. см.* **отступи́ться**

**ОТСТУПИ́ТЬ** *сов.* **1.** сигеү, сигенеү; **отступи́ть на два шага́** ике аҙымға сигенеү **2.** *перед чем*; *перен.* сигенеү; **отступи́ть пе́ред опа́сностью** ҡурҡыныс алдында сигенеү **3.** *от чего* и *без доп.* кире ҡайтыу, дүнеү, үҙгәртеү, боҙоу; **отступи́ть от свои́х взгля́дов** үҙ ҡараштарыңдан кире ҡайтыу **4.** *от чего* ситкә китеү (сығыу); **отступи́ть от те́мы** теманан ситкә китеү **5.** (*сделать отступ*) буш урын ҡалдырыу, буш урын ҡалдырып яҙа башлау

**ОТСТУПИ́ТЬСЯ** *сов. от кого-чего*; *разг.* **1.** (*отказаться*) баш тартыу, кире уйлау (ҡайтыу), таныу, дүнеү; **отступи́ться от свои́х слов** үҙ һүҙеңдән кире ҡайтыу **2.** (*перестать общаться*) ташлау, араны (бәйләнеште) өҙөү; **друзья́ от него́ отступи́лись** дуҫтары уны ташланы

**ОТСТУПЛЕ́НИЕ** *с* **1.** *воен.* сигеү, сигенеү; **отступле́ние отря́да** отрядтың сигенеүе **2.** (*нарушение*) боҙоу, баш тартыу **3.** (*отклонение*) ситкә китеү, тайпылыу ♦ **лири́ческое отступле́ние** лирик тайпылыу

**ОТСТУ́ПНИК** *м* и **ОТСТУ́ПНИЦА** *ж* мөртәт

**ОТСТУ́ПНИЧЕСТВО** *с* мөртәтлек; **станови́ться на путь отсту́пничества** мөртәтлек юлына баҫыу

**ОТСТУПЯ́** **1.** *деепр. от* **отступи́ть** **2.** *нареч.* сигенеп, буш (асыҡ) ара (урын) ҡалдырып

**ОТСТУЧА́ТЬ** *сов. см.* **отсту́кать**

**ОТСУ́ТСТВИЕ** *с* булмау, юҡ булыу, юҡлыҡ; **отсу́тствие специали́стов** белгестәрҙең булмауы ♦ **в отсу́тствие** юҡ сағында, булмағанда

**ОТСУ́ТСТВОВАТЬ** *несов.* **1.** булмау; **отсу́тствовать на ле́кции** лекцияла булмау **2.** (*не иметься*) юҡ; **отсу́тствует аппети́т** аппетит юҡ

**ОТСУ́ТСТВУЮЩИЙ,** -ая, -ее **1.** *прич. от* **отсу́тствовать** **2.** *прил.* (*о взгляде, виде и т.п.*) һалҡын, битараф, бер нәмә лә белдермәгән; **отсу́тствующий взгляд** битараф ҡараш **3.** *в знач. сущ.* **отсу́тствующие** *мн.* булмағандар, килмәгәндәр, булмаусылар, килмәүселәр; **спи́сок отсу́тствующих** булмағандарҙың исемлеге

**ОТСЧИТА́ТЬ** *сов.* **1.** *кого-что* һанап биреү (ҡуйыу); **отсчита́ть миллио́н рубле́й** бер миллион һум һанап биреү **2.** *от чего* (*отмерить*) үлсәп сығыу, һанап үлсәү; **отсчита́ть от барье́ра де́сять шаго́в** барьерҙан ун аҙым үлсәп сығыу

**ОТСЧИ́ТЫВАТЬ** *несов. см.* **отсчита́ть**

**ОТСЫЛА́ТЬ** *несов. см.* **отосла́ть**

**ОТСЫ́ЛКА** *ж* **1.** *см.* **отосла́ть** — **отсыла́ть**; **отсы́лка письма́** хатты ебәреү **2.** (*в тексте*) сығанаҡҡа тоҫҡау (күрһәтеү)

**ОТСЫ́ПАТЬ** *сов. что*, *чего* (бер аҙ) бушатып алыу (биреү), һалып алыу (биреү); **отсы́пать муки́** бер аҙ он һалып биреү

**ОТСЫПА́ТЬ** *несов. см.* **отсы́пать**

**ОТСЫ́ПАТЬСЯ** *сов.*; *разг.* һибелеү, сәселеү, түгелеү, ҡойолоу

**ОТСЫПА́ТЬСЯ I** *несов. см.* **отоспа́ться**

**ОТСЫПА́ТЬСЯ II** *несов.* **1.** *см.* **отсы́паться** **2.** *страд. от* **отсыпа́ть**

**ОТСЫРЕ́ЛЫЙ,** -ая, -ое дымланған, дым тартҡан; **отсыре́лая мука́** дым тартҡан он

**ОТСЫРЕ́ТЬ** *сов.* дымланыу

**ОТСЫХА́ТЬ** *несов. см.* **отсо́хнуть**

